БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
№ 66
1948 йыл
2
апрель
йома
хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә В. М. Молотовта ҡабул итеү. (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында. (1-се бит).
Хеҙмәттә яңы еңеүҙәр — 1 Май байрамына иң яҡшы производство бүләге ул (1-се бит).
Совет халҡына лайыҡлы музыка ижад итергә. «ВКП(б) Үҙәк Комитетында совет музыкаһы деятелдәренең кәңәшмәһе» тигән йыйылыштың бәсын сығарыуға ҡарата. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. З. Нафиков. — Яңыса эшләүсән берегә аҙымдары, С. Сағитов. — Йәш коммунистар менән эшләүҙең һөҙөмтәләре. (2-се бит).
Һәр бер колхозда уңыштыҡ булдырырға. (3-сө бит).
Н. Егоров. — Ҡала общественносеңен намыҫы эше. 3-сө бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Промышленностә ҡаты экономия режиме өсөн

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды үтәү өсөн күп коллективтарҙың ныҡышмалы көрәше республика промышленносеенең эшен байтаҡ яҡшыртыуҙы тәьмин итте. Промышленностең һәр бер тармағында артта ҡалыусы предприятиелар һаны кәмене, ә производствоны, технологияны, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу юнәлешендә үткәрелгән саралар арҡаһында хеҙмәт етештереүсәнлеге байтаҡ күтәрелде. Күп предприятиелар финанс ҡыйынлыҡтарҙы бөтөрөп, рентабелле эшләү генә түгел, бәлки государствоға миллиондарса һум файҙа бирә башланылар.

Алдынғыларҙың уңыштары ни тиклем генә яҡшы булһа ла, продукция эшләп сығарыу артһа ла, тотош алғанда республика промышленносе яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында производство планын үтәп еткермәне. Күп предприятиелар үткән ике йылдың производство пландарын бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәслек булған экономик күрһәткестәр менән тамамланылар. Шуның өсөн дә Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы сталинсе биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планын үтәүҙә республика промышленносеенең һәм төҙөлештең эшен ҡәнәғәтләнерлек түгел тип тапты.

Конференция республика промышленносеенең ҡәнәғәтләнмәслек эшләүендә бик күп етешһеҙлектәрҙе асты. Күп предприятиеларҙа хужалыҡ етәкселәренең һәм партия ойошмаларының, шулай уҡ ВКП(б) ҡала комитеттәренең производство экономикаһына тәрән иғтибар бирмәүҙәре һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, производствоның бөтә сфераларында ҡаты экономия режиме өсөн большевистик көрәштең етерлек булмауы төп етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора.

Быны шулай икәнлеген күп миҫалдар менән иҫбат итергә мөмкин. Нефть промышленносендә артта ҡалыусы мөһим тармаҡтарҙан береһе булған бораулау эшен алайыҡ. Бораулауҙа скважинаның бер сәғәт эшләмәй тороуы государствоға 2 һум 96 тин зарар килтерә. Тимәк, буш тороуға һис юл ҡуйырға ярамай, тигән һүҙ. Ә «Туймазынефть» тресының бораулау конторалары үткән йылдың уң айында ғына утыҙ мең сәғәт ваҡытты бушҡа юғалттылар. Һөҙөмтәлә трест буйынса алғанда проходка тиҙлегенең юғалыуы 12 мең метр тәшкил итте һәм ваҡытты файҙаһыҙға юғалтыу өс ярым миллион һумдан артығыраҡ зарарға килтерҙе. Бында шулай уҡ бер ыңғайы скважиналарҙы төҙөү һәм монтажлауға тотолған расход 24 мең һумға артыҡ тәшкил итте. «Ишимбайнефть» һәм «Башнефтеразведка» трестарында ла шундай уҡ хәл. Төп етешһеҙлек шунда, скважиналарҙы төҙөү, монтажлау ныҡ уйланып эшләнгән берҙәм план менән алып барылмай. Бораулау эше скважиналар тамам төҙөлеп бөтмәгән һәм төп материалдарҙың — торба, долота, балсыҡ һәм башҡаларҙың етерлек запасы булмаған килеш башлана. Ә бораулау эше тамамланған скважиналарҙа материал [illegible] ойошторолмай, [illegible] файҙаланыу [illegible]. Турбиналы бораулауға, станоктарҙы [illegible] күсеү бик акрын бара. Производство экономикаһы, өҫтөн методтары индереү эше менән [illegible] шөғөлләнеү [illegible].

планды үтәмәүгә, ҙур зарар килтерә.

Промышленностең башҡа тармаҡтарында ла алға барыуыбыҙға тотҡарлыҡ итеүсе бындай серьез етешһеҙлектәр бар. Был бигерәк тә директорҙары Ферин, Судаков иптәштәр булған заводтарҙа, Октябрьск, Стәрлетамаҡ, Өфө, Черниковск ҡалаларындағы төҙөлөш трестарына һәм управлениеларына ҡайтып ҡала. Иптәш Бурдаков етәкселек иткән Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһендә капиталь төҙөлөш планының өстән бер өлөшө генә үтәлде, ә шул уҡ ваҡытта 18 миллион һум средствоға артыҡ расход яһауға юл ҡуйылды. Белорет металлургия комбинаты үткән йыл производство планын уңышлы үтәне. Ләкин ете миллион һумдан күберәк средствоны артыҡ расходлау комбинаттың уңышын ныҡ кесерәйтте. Әгәр металл, шихта, яғыулыҡ, огнеупорға экономия яһау, тимер юлда йөк әйләнешенең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн ысын көрәш ойошторолһа бындай ҙур зарар булмаҫ ине.

Биш йыллыҡтың мөһим бурыстарынан сығып, Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы производство экономикаһы менән тәрән шөғөлләнеүҙе, ҡаты экономия режимен һаҡлауҙы талап итте. Һүҙ — пландарҙы үтәү менән бер рәттән, ебәрелгән средствоны, сырьены, материалды, яғыулыҡты, электр энергияһын файҙаланыуҙа государство, халыҡ байлығын һаҡлауҙа, эш көнөн файҙаланыуҙа совет закондары талаптарын ерекә еткереп үтәү тураһында бара. Һәр бер етәксе, ул ҙурмы, йәки бәләкәйме, ул партиялымы йәки партияһыҙмы, был элементарь талапты һис һүҙһеҙ үтәргә бурыслы.

Бөтә илебеҙҙә биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәш барған саҡта экономия режиме өсөк, социалистик накоплениене арттырыу өсөн көрәш айырыуса әһәмиәтле. Быға өлгәшеү өсөн технологик процесте, производствоны, хеҙмәтте ойоштороуҙа иң яҡшы методтарҙы табырға һәм ҡыйыу ҡулланырға, теге йәки был машинаны, станокты эшләүгә, теге йәки был ҡоролманы, скважинаны төҙөүгә күпме средство, материал, техника, кеше хеҙмәте талап ителгәнлеген яҡшы белергә кәрәк. Ул ғына етмәй әле. Эштең аҙ хеҙмәт һәм аҙ средство һалып, тиҙ, арзан һәм яҡшы сифатлы итеп башҡарылыуына өлгәшергә кәрәк. Һәр бер етәксенең сифаты, эш стиле, алға китыуының бына шунан сығып баһалана. Тыуған ил, халыҡ интерестәре, государство һәм партия талаптары юғарылығында булырға теләгән һәр бер етәксе, инженер-техник работник был юғарылыҡҡа өлгәшә ала һәм өлгәшергә тейеш.

Промышленность, транспорт, төҙөлөш предприятиеларенең биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн булған ярыш йөкләмәләрендә, шулай уҡ агрегат заводы коллективенең май байрамы хөрмәтенә алған ярыш йөкләмәһендә лә экономия өсөн көрәш мөһим пункттарҙың береһе итеп ҡуйыла. Ярыш йөкләмәләренең бөтә пункттарын, шул иҫәптән экономия өсөн булған пункттарҙы ла теүәл үтәү өсөн большевистик көрәш ойошторорға кәрәк. Сөнки ҡаты экономия режиме өсөн көрәш һәм йыл буйына промышленностең планы үтәүҙә артта ҡалыуын бөтөрөү өсөн иң мөһим шарттарҙың береһе булып тора.

Өфө ҡала Советенең өсөнсө сессияһын саҡырыу тураһында

1948 йылдың 6 апрелендә Рус драма театры бинаһында (Гоголь урамы, 58 номерлы йорт) хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советенең өсөнсө сессияһы асыла.

Көн тәртибе:

1. Халыҡты медицина ярҙамы менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыу саралары.

Докладсы — ҡала һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдире А. А. Сарыгин.

Ҡушымта докладсы — һаулыҡ һаҡлау буйынса даими комиссия председателе иптәш А. А. Иванов.

2. Ҡала, район башҡарма комитеттәренән һәм уларҙың бүлектәренән хеҙмәтсәндәрҙең [illegible] һәм ғаризаларын ҡарау эше тураһында.

Докладсы — ҡала Советенең башҡарма комитеты председателе иптәш А. В. Кравцов.

Сессияға ҡала һәм район Советтәре депутаттары депутатлыҡ таныҡлыҡтары менән, саҡырылыусылар — саҡырыу билеттәре менән килә.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советенең башҡарма комитеты.

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә В. М. Молотовта ҡабул итеү

СССР Министрҙәр Советы Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә 30 мартта ҡабул итеү ойошторҙо.

Ҡабул итеүҙә Финляндияның Премьер-Министры М. Пеккала әфәнде, сит ил эштәре министрҙәре К. Энкель һәм Р. Свенто әфәнделәр, Эске Эштәр Министры Ю. Лейно әфәнде, Финляндия Сейменың Вице-Председателе У. Кекконен әфәнде, Сейм депутаттары О. Опелтонен һәм И. Седерьельм әфәнделәр, Финляндияның Посланниг К. Сундстрем әфәнде етәкселегендә СССР-ҙағы миссия членъдәре һәм Мәскәүгә вәкил итеп ебәрелгән сит ил посольстволарының һәм миссияларының етәкселәре ҡатнаштылар.

Ҡабул итеүҙә шулай уҡ Монголияның Премьер-Министр урынбаҫары С. Лубсан әфәнде етәкселегендә Мәскәүҙәге сауҙа делегацияһы членъдәре, Болгарияның сауҙа һәм аҙыҡ-түлек министры К. Дебрев әфәнде етәкселегендәге сауҙа делегацияһы членъдәре һәм Польша сауҙа делегацияһы членъдәре ҡатнаштылар.

Ҡабул итеүҙә Советтәр Союзы яғынан РСФСР Министрҙәр Советы Председателе М. И. Родионов, СССР Министрҙәре И. В. Ковалев, Д. Г. Жимерин, Г. М. Орлов, Л. П. Грачев, СССР Сит ил Эштәре Министрының урынбаҫарҙары А. Я. Вышинский, В. А. Зорин, СССР-ҙың Посолдары А. А. Лаврищев, Н. В. Рощин, СССР-ҙың Финляндиялағы Посланнигы Г. М. Савоненков, авиация маршалы К. А. Вершинин, инженер ғәскәрҙәре маршалы М. П. Воробьев, артиллерия маршалы Н. Д. Яковлев, СССР Тышҡы сауҙа Министрының урынбаҫары П. Н. Кумыкин, В. Н. Меркулов, И. А. Парфенов, В. Н. Черноусов, Н. П. Фирюбин, П. В. Абрамов, Н. Г. Пальгунов, РСФСР Мәғариф Министры А. А. Вознесенский, СССР Сит ил Эштәре Министрлығының, МВТ-ның һәм МВС-ның яуаплы сотрудниктәре, искусство деятелдәре, общественность һәм матбуғат вәкилдәре ҡатнаштылар.

Ҡабул итеү дуҫтарса обстановкала үтте. (ТАСС).

ДУҪЛЫҠ, ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ҺӘМ ҮҘ-АРА ЯРҘАМ ТУРАҺЫНДА СОВЕТ-ВЕНГРИЯ ДОГОВОРЫН РАТИФИКАЦИЯЛАУ

1948 йылдың 30 мартында СССР Верховный Советы Президиумы Совет Социалистик Республикалар Союзы һәм Венгрия республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Мәскәүҙә 1948 йылдың 18 февралендә ҡул ҡуйылған договорҙы ратификацияланы.

Хеҙмәттә яңы еңеүҙәр—1 май байрамына иң яҡшы производство бүләге ул

Паровозсыларҙың йөкләмәләре

Өфө паровоздар ремонтлау заводы ғинуар һәм февраль айҙарында производство планын, берәмектәр буйынса алғанда, үтәп еткермәне. Был, коллективтан үҙ эшен ҡырҡа яҡшыртыуҙы, эске мөмкинлектәрҙе киң файҙаланыуҙы талап итте.

Заводтың иң ҙур цехтарынан булған йыйнау цехы коллективы (начальнигы иптәш Цокаллов) май алды социалистик ярышын ойоштороуға саҡырып, март айында заводтың башҡа цех коллективтарына мөрәжәғәт итте. Цех коллективы беренсе кварталда килеп тыуған өҙөклөктө ҡырҡа бөтөрөү, апрель планын 106 процентҡа үтәү йөкләмәһен алды. Һәм быны өсөн ул бөтә цехтарҙың коллективтары алдына ремонтлау һәм монтажлау эшендә технологик режимде тулыһынса тормошҡа ашырыу, йыйнауға тик яҡшы сифатлы ғына деталдәр биреү, бригадирҙарҙың яуаплылығын күтәреү, специалләштерелгән группаларҙы ойоштороуҙы ҡабатлап ҡарау һәм станоктарҙың простойҙарын ҡырҡа бөтөрөү бурысын ҡуйҙы. Башҡа цехтарҙың коллективтары йыйнау цехы эшселәренең саҡырыуына берҙәм ҡушылып, үҙҙәре тарафынан өҫтәмә йөкләмәләр алдылар.

Ошолар менән бер рәттән завод коллективы завод территорияһын сүп-сарҙан таҙартыу буйынса воскресниктар ойошторорға ҡарар итте.

Заводтың партия комитеты цех партия ойошмалары секретарҙәренең кәңәшмәһен үткәреп, унда май алды ярышы тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Һәм цехтарҙа эшселәр араһында агитацион-массовый эште артабан киң йәйелдереү, алдынғы стахановсыларҙың эш тәжрибәләрен популярлаштырыуҙы яҡшыртыу, ярыштың барышын производство кәңәшмәләрендә тикшереп барыу юнәлешендә мөһим саралар билдәләне.

Биш йыллыҡ норма үтәнеләр

ОКТЯБРЬСК. Төҙөү управлениеһенең эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре ленинградлыларҙың саҡырыуына яуап итеп биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн индивидуаль йөкләмәләр алғайнылар. Был йөкләмәләрҙе үтәү маҡсатында партия ойошмаһы (секретаре иптәш Лищевич) эшселәр араһында киң агитация алып барыуҙы ойошторҙо.

Ворсин Александр һәм Катаев Александр етәкселек иткән балта оҫталары бригадалары социалистик ярышта һоҡланғыс эш күрһәткестәре бирҙеләр. Иптәш Ворсин бригадаһы 20 мартҡа үҙенең биш йыллыҡ нормаһын тамамланы. 1939 йылдан бирле нефтселәргә торлаҡ төҙөүҙә эшләүсе күренекле мастер һуңғы ике йыл эсендә 6 йәш эшсене балта оҫтаһы итеп өйрәтте. Уның өйрәнсеге А. Горшкин, маҡтаулы бригадире өйрәткән метод менән эшләп, 20 мартҡа тиклем биш йыллыҡ норма бирҙе һәм 1948 йылда тағы ла ике йыллыҡ норма үтәргә йөкләмә алды.

Главнефтегазстрой уларҙы «Почет грамотаһы» менән наградланы.

Иптәш Катаев бригадаһы беренсе апрелгә биш йыллыҡ норманы үтәп, ағымдағы йылдың һигеҙ айы эсендә яңынан ике йыллыҡ норма бирергә йөкләмә алды.

Социалистик ярышты йәйелдереү нигеҙендә төҙөлөш управлениеһенең коллективы беренсе квартал заданиеһен ун көн алдан тамамлауға ирешт. Был уңышты яулап алыуҙа иптәш Синяк бригадаһы квартал планын 271 процентҡа үтәп, ҙур хеҙмәт һалды. Ер ҡаҙыу эштәрен башҡарыусы иптәш Акопян бригадаһы 20 мартҡа ике йыллыҡ норма бирҙе.

С. Ғәлимова.

Пландан тыш 120 мең квадрат метр быяла

Красноусол быяла заводы коллективы (директоры иптәш Валиц, партком секретаре иптәш Чушкин) биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылып, юғарылатылған темп менән эшләй. Намыҫлы хеҙмәт һөҙөмтәһендә коллектив беренсе квартал планын срогынан 15 көн алда үтәне, квартал аҙағына пландан тыш 120 мең квадрат метр быяла эшләп сығарҙы.

Мастерҙар М. И. Хаиров, В. А. Суздальцев, В. С. Зулькин, быяланы йәшниккә тултырыусы Зулькин, сульфат ваҡлаусы З. Л. Дәүләтшина, быяла киҫеүсе С. Кәримов иптәштәр һәр сменала 1,5—2 норма бирәләр.

Л. Кальметьев.

Өс айҙа уп миллион һум файҙа

Беҙҙең завод коллективы ленинградлыларҙың патриотик саҡырыуҙарына ҡушылып, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүгә социалистик йөкләмә алғайны.

Эшселәр, инженер-техник работниктәр алған йөкләмәләрен үтәүҙә фиҙакәр эшләйҙәр һәм яҡшы уңыштарға өлгәшәләр. Мәҫәлән, I квартал планы срогынан алда үтәлде. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 6 процентҡа түбәнәйтелде. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, сырьё, материал, яғыулыҡ һәм электр энергияһына экономия өсөн, производство юғалтыуҙарына ҡаршы көрәш һөҙөмтәһендә коллектив өс ай эсендә Тыуған илебеҙгә пландан тыш 10 миллион һумдан артығыраҡ файҙа бирҙе.

Хәҙер коллектив Өфө агрегат заводы коллективы өлгөһендә май алды социалистик ярышына ҡушылып, конкрет йөкләмә алды һәм май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫты.

Ярышта начальнигы иптәш Ежов булған цех һәм иптәш Бикметов етәкселек иткән установка коллективтары алда баралар.

Р. Дауытов,
Черниковск нефть эшкәртеү заводы партия ойошмаһының секретаре урынбаҫары.

Тимер юлсылар коллективтарында

В. В. Куйбышев исемендәге тимер юлдың Өфө бүлекселе предприятиелары коллективтары берҙәм рәүештә май алды социалистик ярышына ҡушылдылар.

Өфө депоһы ремонтсылары март айы заданиеһен срогынан ике көн алда үтәп, пландан тыш бер локомотив ремонтланылар. Стахановсылар — слесарь Скрябин, Бессонцева, Положенцева һәм башҡалар бер айҙа дүртәр норма үтәнеләр. Ремонт цехы коллективы май айына тиклем пландан тыш 2 паровоз ремонтларға, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 10 процентҡа кәметергә йөкләмә алып, уны үтәү юлында намыҫлы эшләй.

Ишембай станцияһы коллективы май алды ярышына сығып, апрель айында тейәү планын 20 процентҡа арттырып үтәүгә һүҙ бирҙе.

Өфө станцияһы работниктәре апрель айында тейәү планын 120 процентҡа үтәү өсөн көрәшәләр. Күптән түгел станцияла производство-техник конференция булды, ул йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн конкрет саралар билдәләне.

М. Левитин.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумында

1948 йылдың 23 мартында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ултырышы булды.

Президиум, социалистик законсылыҡты ереһе еткереп эш күреү тураһында, хеҙмәтсәндәр депутаттарының Ҡандра район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Мусиндең докладын тыңлап, Ҡандра район Совет башҡарма комитеты Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының «Революцион законсылыҡты ерекә еткереп эш күреү тураһындағы» 1946 йыл 2 август ҡарарын үтәмәгән, тип билдәләне.

Ҡандра район Советы башҡарма комитетының, шулай уҡ район прокурорының социалистик законсылыҡты ныҡытыу буйынса көндәлек эш алып бармауҙары һөҙөмтәһендә 1947 йылда районда социалистик законсылыҡты боҙоуҙар булған.

«Урал», «Урта күл», «Байҡал», Фрунзе, Чапаев исемендәге һәм башҡа колхоздарҙың правлениелары законһыҙ рәүештә колхозсыларға аҡсалата штраф һалып, ауыл хужалығы артеле Уставының 17 параграфын тупаҫ рәүештә боҙғандар. Сардыҡ, Туҡай ауыл Советтарының председателдәре суд органдарының функцияларын үҙ өҫтәренә алып, граждандарҙың милектәрен алыу тураһында законһыҙ рәүештә ҡарар сығарғандар.

Колхозсыларҙы колхоздан дөрөҫ сығармау ваҡиғалары ла бар. «Безбожник» колхозында бер үк ҡарар менән нигеҙһеҙ рәүештә 4 колхозсы колхоздан сығарылған. «Ҡаран йылға» колхозында колхозсыларҙы тулы хоҡуҡлы булмаған йыйылыштарҙа колхоздан сығарыу фактылары булған.

Күп колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙар һаман дауам итә. «Алға» колхозының правлениеһе үҙенең ҡарары менән райпотребсоюздың әҙерләүҙәр конторыһы работниктәренә колхоз ерен бирә.

Социалистик законсылыҡты боҙоу мөмкинлектәрен алдан иҫкәртеү һәм надзорлыҡ бурысын үтәү буйынса Ҡандра район прокурорының етерлек эшләмәүен билдәләп, Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Президиумы социалистик законсылыҡты ереһе еткереп эш күреүгә йөкләтелгән саралар күреүҙе республика прокуроры иптәш Набатовҡа тапшырҙы.

Президиум Ҡандра район Советының председателе иптәш Мусинде социалистик законсылыҡты боҙоуҙарҙы булдырмауҙы төп маҡсат итеп ҡуйып, совет закондарын аңлатыу буйынса халыҡ араһында систематик рәүештә эш алып барырға, ауыл һәм поселка Советтәренең ҡарарҙарының законға ярашлы булыуына контроль урынлаштырырға, социалистик законсылыҡты бөтә боҙоу фактыларын Советтәрҙең башҡарма комитеттәрендә ҡарап, улар буйынса тейешле ҡарар ҡабул итергә мәжбүр итте.

Унан һуң Президиум, күп балалы әсәләрҙе наградлау өсөн тапшырыу һәм «1941—1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында батыр хеҙмәт өсөн» медалдәрен биреү эштәренең барышы тураһында, хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Алексеевтең докладын тыңланы.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Өфө район Советы башҡарма комитетының күп балалы әсәләрҙе наградлауға тапшырыу өсөн материалдарҙы тиҙ оформить итеү сараһын күреү тураһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ҡарарын үтәүҙе үҙ ваҡытында тәьмин итмәүен билдәләне. Һөҙөмтәлә, 1948 йылдың 20 мартына 1906 күп балалы әсәләрҙән иң бары 1027 генә кеше наградлау өсөн тапшырылған. Шулай була тороп, район Советы башҡарма комитеты был наградлауға тапшырыу эшен бөтөнләй тейерлек туҡтатҡан. 1948 йылдың өс айы эсендә наградлауға иң бары 29 әсә күрһәтелгән.

Президиум, шулай уҡ, Өфө район Советы башҡарма комитетының колхозсыларҙы, эшсе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе «1941—1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында батыр хеҙмәт өсөн» медале менән наградлау буйынса ла ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүен билдәләне. Ошо көнгә тиклем районның бик күп колхоздарында колхозсылар наградлауға тапшырылмағандар.

Президиум, күп балалы әсәләрҙе наградлау һәм «1941—1945 йылғы Бөйөк Ватан һуғышында батыр хеҙмәт өсөн» медалдәрен тапшырыу буйынса Өфө район Советы башҡарма комитетының эшен, ҡәнәғәтләнерлек түгел, тип тапты.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы, Өфө район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Алексеевтең был мөһим эшкә һалҡын ҡарауын ҡаты тәнҡитләне, уның Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының ҡарарҙарын үтәүгә яуапһыҙ ҡарауын билдәләне һәм күп балалы әсәләрҙең материалдарын оформить итеү, уларҙы наградлауға күрһәтеү һәм, шулай уҡ, колхозсыларға, эшсе һәм хеҙмәткәрҙәргә медалдәр тапшырыу эшен 1948 йылдың май айына тамамлау сараларын күреүҙе талап итте.

Совет халкына лайыклы музыка ижат итергә

«ВКП(б) Үҙәк Комитетендә совет музыкаһы деятелдәренең кәңәшмәһе» тигән йыйынтыкты басып сығарыуға ҡарата

1948 йылдың гинуар урталарында ВКП(б) Үҙәк Комитетенда совет музыкаһы деятелдәренең кәңәшмәһе булды. Был кәңәшмәлә 70-тән артыҡ композитор, дирижер, музыка тәнҡитселәре һәм музыка белгестәре ҡатнашты.

Кәңәшмә В. Мураделиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһына общественный просмотрҙың йомғаҡтары айҡанлы совет музыкаһының торошо һәм уның үҫеше мәсьәләләрен тикшереүгә арналғайны.

Кәңәшмәнең эшендә ВКП(б) Үҙәк Комитете секретарҙәре А. А. Жданов, А. А. Кузнецов, М. А. Суслов, Г. М. Попов иптәштәр ҡатнашлыҡ иттеләр.

Кәңәшмәне иптәш А. А. Жданов асты. Үҙенең инеш телмәрендә иптәш А. А. Жданов Мураделиоперәһының етешһеҙлектәренә, уның банкротлыҡҡа осрауының сәбәптәренә һәм шарттарына туҡталды.

«Бөйөк дуҫлыҡ» операһы барыһынан элек музыка яғынан уңышһыҙ опера булып сыҡты. Уңда хәтерҙә ҡалырлыҡ бер генә мелодия ла юҡ. Ул үҙенең йөкмәткеһе буйынса ярлы һәм күпселек өлөшөндә ҡолаҡ төндөргөс тауыштарҙың тәртипһеҙ йыйынтығы булып тора. Уның гармониялы булмауы, музыканың унда уйнаусы кешеләрҙең эске кисерештәренә, кәйефтәренә һәм сәхнәлә күрһәтелә торған ваҡиғаларға ярашлы булмауы иҙеүсе тәьҫир ҡалдыра.

Операла һүҙ Төньяҡ Ҡавказда Совет власе урынлаштырыу осоро тураһында барһа ла, операның музыкаһы Төньяҡ Кавказ халыҡтарының халыҡ ижадына алыҫ һәм ят. Операның вокаль өлөшө ярлы һәм асыҡ аңлайышлы түгел. Уның төп йөкмәткеһе лә яһалма һәм ялған.

«Әгәр ҙә опера,—ти иптәш А. А. Жданов, — музыкаль һәм вокаль искусствоһының бөтә төп төрҙәренең уңыштарын үҙендә дөрөҫ яраштырып, искусствоның юғары синтетик формулаһы булып тора икән, күп йылдарҙан һуң килеп тыуған операның уңышһыҙ булыуы совет музыка искусствоһының серьез етешһеҙлеген аңлата. Был айырым ваҡиға түгел һәм шуның өсөн уны Мураделиҙең ижади уңышһыҙлығына ғына ҡайтарып ҡалдырырға ярамай».

Әле 1936 йылда уҡ «Правда» газетаһында «Музыка урынына сумбур» тигән редакцион мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Был мәҡәлә Үҙәк Комитеттең күрһәтмәһе буйынса баҫып сығарылды һәм Шостаковичтең «Мценск өйәҙенең Леди Макбете» тигән операһы тураһында Үҙәк Комитеттең фекерен сағылдырҙы. Мәҡәләлә Д. Шостаковичтең был формалистик әҫәре һәм совет музыкаһындағы бөтә формалистик юнәлеш киҫкен рәүештә тәнҡитләнгәйне. 12 йыл үтте һәм «хәҙер,—ти иптәш Жданов, — ул ваҡытта уҡ гәйепләнгән юнәлештең музыкала йәшәгәнлеге, һәм йәшәү генә түгел, бәлки совет музыкаһына юнәлеш биргәнлеге ап-асыҡ».

Иптәш Ждановтың инеш телмәренән һуң кәңәшмәлә фекер алышыуҙар башланды. Бында композиторҙар, музыка белгестәре һәм тәнҡитселәр ҡатнаштылар. Улар совет музыка ижадындағы серьез етешһеҙлектәр тураһында, тәнҡиттең булмауы һәм башында формалист композиторҙар торған композиторҙар союзының ойоштороу комитетенда тәнҡитте һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙе ҡыҫыу тураһында һөйләнеләр. Музыка белеме алыуҙың бөтә системаһындағы тәрән етешһеҙлектәр ҙә күрһәтелде.

Т. Хренников, В. Захаров иптәштәр һәм башҡа музыканттар: халыҡҡа бөтөнләй ят һәм аңлайышһыҙ музыка яҙыусы Шостакович, Прокофьев, Шебалин һәм башҡа шундай композиторҙарға совет тамашасылары үҙҙәренең ышаныстарын юғалттылар, тинеләр. Ҡарт совет музыканты профессор А. Гольденвейзер, күп кенә совет композиторҙары рус музыкаль классикаһының бөйөк традициялары тураһында оноттолар, ти.

Кәңәшмәлә формалистик симфонияларҙың һәм операларҙың авторҙары — Д. Шостакович, В. Мурадели, А. Хачатурян, Шебалин сығыш яһанылар. Ләкин был сығыштарҙа ысын күңелдән үҙ-үҙеңде тәнҡитләү булманы һәм был сығыштар кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙы ҡәнәғәтләндермәнеләр.

Тикшереү барышында иптәш А. А. Жданов ҙур телмәр менән сығыш яһаны. Иптәш Жданов искусство эштәре буйынса комитет һәм уның элекке председателе иптәш Храпченко тарафынан ебәрелгән тупаҫ хаталарҙы күрһәтеп үтте. Иптәш Храпченко, совет музыкаһында реалистик юнәлеште үҫтереү һәм уны яҡлау урынына формалистик юнәлештәге композиторҙарҙың эшен хуплаған. Композиторҙар союзында тонсоу, серек атмосфера тамыр йәйҙе, тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләү бөтөнләй булманы, ойоштороу комитете етәкселәре композиторҙар массаһынан бөтөнләйгә ситләште. «Ижади бәхәстәр, тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит юҡ икән,—ти А. А. Жданов, — тимәк алға табан хәрәкәт тә юҡ...»

«...Беҙҙә, совет музыкаһында ике юнәлештең, улар тыштан йәшеренгән булһа ла, бик киҫкен көрәше бара,—тип дауам итә иптәш Жданов. — Бер юнәлеш — совет музыкаһында һау, прогрессив башланғысты күрһәтә. Ул классик мираҫтың ғәйәт ҙур ролен һәм, айырым алғанда, рус музыка мәктәбенең традицияларын таныуға, музыкала юғары идеялылыҡ һәм йөкмәткелелектең бергә ярашыуына, уның дөрөҫ һәм реалистик булыуына, халыҡ менән, уның музыка йыр ижады менән тәрән органик бәйләнешле булыуына, юғары профессиональ оҫталыҡ менән бергә ярашыуына нигеҙләнгән. Икенсе юнәлеш совет искусствоһына ят булған формализмде, ялған новаторлыҡ флагы аҫтында классик мираҫтан баш тартыу, музыканың халыҡсанлығынан айырым эстеттәрҙең ҙур булмаған төркөмөнөң индивидуаль кисерештәренә ярарға тырышып, халыҡҡа хеҙмәт итеүҙән баш тартыуҙы күҙаллайҙар.

Был юнәлеш тәбиғи матур, кешеләрсә булған музыканы ялған, вульгар һәм йыш ҡына патологик музыка менән алыштырыуҙы тормошҡа ашыра».

Совет музыкаһының үҫешенә формализм ҙур зарар килтерә. Формалистик музыка халыҡ нигеҙлегенән айырылған, классиктарҙың традицияларына ят нәмә булып тора. Һәр бер тыңлаусы формалистик юнәлештәге совет композиторҙарының әҫәрҙәре классик музыкаға тамырынан уҡ оҡшамайҙар, тип әйтер. Дөрөҫлек һәм реализм, гүзәл художестволы форманың һәм тәрән йөкмәткенең берҙәмлегенә өлгәшә белеү, юғары оҫталыҡты ябайлыҡ һәм аңлайышлылыҡ менән ярашытыра белеү классик музыка өсөн бик характерле булып тора. Ғөмүмән классик музыкаға һәм, бигерәк тә рус классик музыкаһына формализм һәм тупаҫ натурализм ят нәмәләр улар. Классик музыка өсөн халыҡтарҙың музыкаль ижадындағы классик музыка сығанаҡтарын таныуға нигеҙләнгән юғары идеялылыҡ, халыҡҡа, уның музыкаһына һәм йырына тәрән хөрмәт һәм мөхәббәт характерле булып тора».

Формалистик композиторҙар араһында хәҙерге заман көнбайыш—буржуаз музыка менән мауығыу һәм хатта уға билдәле бер дәрәжәлә ориентация тотоу бар. Милли музыка менән сит ил музыкаһының сағыштырмаһы тураһындағы мәсьәләгә күсеп, иптәш Жданов искусстволағы ысын интернационализмға асыҡ һәм тәрән анализ бирә.

«Әгәр беҙҙең рус музыкаһының, шунан һуң совет музыкаһының тарихен тикшерһәк, шундай һығымта яһарға кәрәк: беҙҙең музыка тап үҙ аяҡтарына баҫа алғаны өсөн һәм үҫешендә халҡыбыҙҙың эске донъя байлығын асыуға мөмкинлек биргән үҙ юлдарын таба алғаны өсөн үҫеп китте һәм ҡеүәтле көскә әйләнде. Милли музыканың — рус халҡының һәм шулай уҡ, Советтәр Союзы составына ингән совет халыҡтарының музыкаһының сәскә атыуы искусствола интернационализмде нигеләйҙер кәмһетеүҙе аңлата тип иҫәпләүсе кешеләр тәрән яңылышалар. Искусствола интернационализм милли искусствоны ярлыландырыу һәм кәмһетеү нигеҙендә тыумай. Киреһенсә интернационализм милли искусство сәскә атҡан ерҙә тыуа. Был хәҡиҡәтте онотоу — етәкселек линияһын һәм үҙеңдең йөҙөңдө юғалтыуҙы, ырыуһыҙ космополиттарға әүерелеүҙе аңлата. Үҙенең юғары музыкаль культураһы булған халыҡ ҡына башҡа халыҡтарҙың музыка байлығын баһалай ала. Үҙ тыуған иленең ысын патриоты булмай тороп, башҡа күп нәмәләрҙәге кеүек уҡ, музыкала ла интернационалист булып булмай. Әгәр интернационализм нигеҙенә башҡа халыҡтарға ихтирам итеү һалынған икән, ул ваҡытта үҙ халҡыңды ихтирам итмәй һәм һөймәй тороп интернационалист булып булмай».

Иптәш Ждановтың ысын һәм ялған новаторлыҡ тураһында әйткән фекерҙәре бик ҡиммәтле: «Новаторлыҡ хоро маҡсат ҡына түгел, һәр бер яңылыҡ иҫкенән яҡшыраҡ булырға тейеш, юҡ иһә уның мәғәнәһе булмай. Минеңсә, формализм юнәлеше эҙенән барыусылар был һүҙҙе башлыса насар музыканы пропагандалау мәҡсәттәрендә ҡулланалар. Музыкалағы һәр төрлө оригиналлек итеүҙе һәр төрлө боргаланыу һәм һыргаланыуҙы, новаторлыҡ тип атарға ярамай инде».

«Әгәр совет композиторҙарының билдәле бер өлөшө араһында «беҙҙе 50—100 йыл үткәс аңларҙар әле», «беҙҙең замандаштар аңлай алмайҙар икән, беҙҙән һуңғы быуындар аңларҙар», тигән теория таләмәтенең йөрөүе ул ҡурҡыныслы нәмә...

Бындай фекер йөрөтөү халыҡтан айырылыуҙы аңлата. Әгәр мин — яҙыусы, художник, әҙәбиәтсе, партия работнигы, мине замандаштарым аңларҙар тип иҫәп тотмайым икән, ул саҡта мин кем өсөн йәшәйем һәм эшләйем һуң? Ул рухи бушлыҡҡа, тупикҡа алып бара ла баһа...».

Совет композиторҙарының ижадында музыкала вульгар натурализм менән әҙәпһеҙ мауығыу йәшәп килә. «Тураһын әйтергә кәрәк,—тип билдәләй иптәш Жданов, — хәҙерге заман композиторҙарының күп әҫәрҙәре натуралистик тауыштар менән шул тиклем артыҡ һуғарылғандар һәм улар, матур итеп әйтмәгәнем өсөн ғәфү итегеҙ, белмәйем — әллә бораулау машиналарын, әллә музыкаль йән алғыстарҙы хәтерләтәләр. Һис тыңлау мөмкин түгел, һеҙ уға иғтибар итегеҙ!».

Иптәш Жданов былай тип әйтә: «Беҙ матур, нәфис музыка яғында торабыҙ, совет кешеләренең эстетик ихтыяждарын һәм художестволы вкустарын ҡәнәғәтләндерергә һәләтле булған музыка яғындабыҙ, ә был ихтыяждар һәм вкустар сикһеҙ үҫте. Халыҡ, музыкаль әҫәрҙең талантлылығына, уның беҙҙең осоробоҙҙоң рухын, халҡыбыҙҙың рухын ни тиклем тәрән сағылдырыуына, киң ҡатлам массаларға ни тиклем аңлайышлы булыуына ҡарап баһа бирә. Музыкала гениаллек нәмә һуң ул? Ул матурлыҡ һөйөүсе гәмле тамаҡтарҙан кемдеңдер берәүҙең, ҙур булмаған төркөмө генә баһалай ала торған нәмә түгел. Музыкаль әҫәр ни тиклем юғары булһа, ни тиклем күп кешеләр тарафынан танылһа, ни тиклем күп кешеләрҙе рухландырырға һәләтле булһа, шул тиклем гениальный була. Аңлайышлы һәр бер нәмә гениаль түгел, ләкин бөтә ысын гениаль булған нәмә аңлайышлы, һәм ул халыҡтың киң ҡатлам массаһына ни тиклем аңлайышлы булһа, ул шул тиклем гениаллерәк була».

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар тарафынан ҙур иғтибар менән тыңланған телмәренең аҙағында иптәш А. А. Жданов һығымталар яһауға күсә:

«Классик мираҫтың әһәмиәтен тулыһынса аяҡҡа баҫтырырға кәрәк, кешегә аңлайышлы нормаль музыканы аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Формалистик юнәлеш тарафынан музыканы бөтөрөүгә булған ҡурҡынысты ныҡлап билдәләп үтәргә кәрәк, һәм был юнәлеште музыкаль культураның бөйөк мастерҙәре тарафынан тыуҙырылған искусство бинаһын емерергә геростраттарса маташыу тип баһаларға кәрәк. Беҙҙең бөтә композиторҙарыбыҙҙың үҙ эштәрен ҡабаттан ҡарауҙары һәм үҙ халҡына йөҙ менән боролоуҙары кәрәк. Беҙҙең партиябыҙ государствобыҙҙың, халҡыбыҙҙың интерестәрен ҡайғыртып, музыкала һау, прогрессив юнәлеште — совет социалистик реализм юнәлешен генә яҡлаясаҡ икәнлеге тураһында һәр кемдең үҙенә отчет биреүе кәрәк».

Совет композиторҙары алдында юғары дәрәжәләге ике яуаплы бурыс тора. «Совет музыкаһын үҫтереү һәм камиллаштереү — иң мөһим бурыс. Икенсе бурыс — совет музыкаһын буржуазияның тарҡалыу элементтәре инеүенән һаҡлап алып ҡалыуҙан тора». Иптәш А. А. Жданов былай тип иҫкәртә: «Шуны иҫәпкә алырға кәрәк, сит илдән ингән ят буржуаз йоғонтоларының совет интеллигенцияһының ҡайһы бер вәкилдәренең аңындағы капитализм ҡалдыҡтары менән осрашасаҡтар. Был ҡалдыҡтар совет музыка-культураһының хазинаһын хәҙерге заман буржуаз искусствоһының ҡыҙғаныс йолҡондоғона алыштырыуға иҫәп тотҡан серьез булмаған һәм ҡырҡый ынтылыштарында күҙәләнә. Шуның өсөн дә, совет композиторҙарының музыкаль ҡолаҡтары ғына түгел, политик ҡолаҡтары ла бик һиҙгер булырға тейеш».

Иптәш А. А. Жданов үҙенең телмәрен түбәндәге һүҙҙәр менән тамамлай: «Иптәштәр, ҡасандыр үҙҙәренең таланттары менән бөтә донъяны хайран ҡалдырған, беҙҙең халыҡты даңға күмгән композиторҙарыбыҙға ҡарағанда ла күберәк, көслөрәк булған беҙҙең үҙебеҙҙең «ҡеүәтле төркөм» кешеләре булыуын теләйбеҙ. Үҙегеҙҙең көслө булыуығыҙ өсөн йомшартҡа торған барлыҡ нәмәне үҙ юлығыҙҙан ситкә алып ташларға һәм һеҙгә көслө, ҡеүәтле булырға ярҙам иткән ҡоралланыу средстволарын ғына һайлап алырға тейешһегеҙ. Әгәр ҙә һеҙ гениаль классик музыка мираҫын тулыһынса файҙаланаһығыҙ икән, һәм шуның менән бергә уны беҙҙең бөйөк осорҙоң яңы ихтыяждары рухында йәйелдерһәгеҙ икән, һеҙ совет «ҡеүәтле төркөмө» буласаҡһығыҙ. Беҙ әле һеҙ кисергән артта ҡалыуҙы мөмкин тиклем тиҙерәк бөтөрөүегеҙҙе, эшегеҙҙе тиҙерәк ҡабаттан ҡороуығыҙҙы һәм бөтә совет халҡының ғорурлығы булған совет композиторҙарының данлы кагортаһы булып әүерелеүегеҙҙе теләйбеҙ».

Совет музыкаһы деятелдәре кәңәшмәһендә иптәш Ждановтың һөйләгән телмәре, В. Мураделиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһы тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең тарихи ҡарары беҙҙең халҡыбыҙға булған тәрән һөйөү, совет культураһы, совет искусствоһы тураһында атайҙарса хәстәрлек күреү менән һуғарылған. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең театр, әҙәбиәт, кино тураһындағы билдәле ҡарарҙары кеүек партияның был документтәре лә совет художество культураһын артабан үҫтереүҙә ҙур роль уйнаясаҡ, беҙҙең илебеҙҙә мул һәм бай рухани культураны тыуҙырыуҙа ярҙам итәсәк. Быны беҙҙең партиябыҙ социализм бурыстарының береһе итеп иҫәпләй.

Өс процентле заемдың отош тиражы

30 мартта Мәскәүҙә, метро төҙөлөшө работниктәренең культура Дворецендә, өс процентле эске заемдарҙың икенсе отош тиражы үткәрелде. Тиражда 4.650.200 һумлыҡ 8.500 отош уйналды.

7-се номерле 80619 сериялы һәм 7-се номерле 97433 сериялы облигациялар 50-шәр мең һум оттолар.

42-се номерле 06105 сериялы, 36-сы номерле 10396 сериялы, 13-сө номерле 40993 сериялы, 23-сө номерле 44375 сериялы һәм 41-се номерле 70954 сериялы облигацияларҙы тотоусылар 25-шәр мең һум оттолар.

Тиражда, шулай уҡ, 10-ар мең һумлыҡ 25, бишәр мең һумлыҡ 80, берәр мең һумлыҡ 700, һәр береһе 400 һумлыҡ 7688 отош уйналды.

Был заемдың нәүбәттәге киләсәк тиражы 1948 йылдың 30 майында буласаҡ. (ТАСС).

Өс картуфтан—йөҙ меңләгән бот картуф

БОГОРОСЛАН, (Чкалов өлкәһе). (ТАСС). Богоруслан районының Пилюгин МТС-ы участка агрономы иптәш Быстров һуғыш башланыр алдынан ғына Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһенән «Эпрон» исемле сорттағы өс картуф алып ҡайтҡайны. Иптәш Быстров колхозсылар-тәжрибәселәр ярҙамы менән районда был яңы сорт картуфты үҫтереү эшенә тотона. Бының һөҙөмтәләре яҡшы булды.

Уҙған йылда «Эпрон» картуфы 70 гектар майҙанға ултыртылғайны. Был сорт картуфты ултыртыу шулай уҡ байтаҡ колхоздарҙың, колхозсыларҙың, эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең баҡсаларында күрелә башланы. «Пламя» колхозы члены И. Н. Трусова 1947 йылда 1.400 грамм ауырлығындағы эре картуфтар үҫтерҙе. Шул уҡ колхоздың тәжрибәсеһе иптәш Иванов гектарынан 2.795 бот «Эпрон» картуфы алды.

Ағымдағы йылда Богоруслан районының колхоздары 300 гектар самаһы «Эпрон» картуфы сәсәсәктәр. Агроном Быстров һәм районның тәжрибәселәре яңы биш йыллыҡтың аҙағына, был сорт картуфты гектарынан, һуғарылмай торған урындарҙа 3 мең ботҡа тиклем һәм һуғарыла торған урындарҙа 6 мең ботҡа тиклем урожай йыйнау йөкләмәләрен алдылар.

АКШ-та Советтәр Союзының „Россия" тигән судноһын тотоуға ҡаршы протест

18 мартта Америка властары Советтәр Союзының Нью-Йоркка килгән «Россия» тигән судноһына арест һалғандар. Булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Америка властары үҙҙәренең был законһыҙ хәрәкәттәрен, имеш дингеҙҙә «Россия» судноһында килгәндә [illegible] ике пассажирҙың талаптары менән аңлатырға маташалар.

Совет Посольствоһы, Советтәр Союзы Хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса, сит ил государстволарыныҡы булған һәм шуға күрә суд иммунитеты менән файҙаланыусы судноға арест һалыуҙың юл ҡуйылмаған эш икәнлегенә АКШ Государство Департаменте иғтибарын юнәлтте һәм Америка властарының был күрһәтелгән хәрәкәттәренә протест белдерҙе. Посольство шулай уҡ Америка властарының был законһыҙ хәрәкәттәрен бөтөрөү һәм шул саҡта булған зарарҙы [illegible] саралар күреләсәген көтөүен белдерҙе.

(ТАСС).

Партия тормошо

Яңыса эшләүҙең беренсе аҙымдары

Өфө агрегат заводы партия ойошмаһы, ВКП(б)-ның ҡала һәм өлкә конференцияларының күрһәтмәләре нигеҙендә, коммунистарҙы политик тәрбиәләү эшен ҡайтанан үҙгәртеп ҡорҙо. Бөтә коммунистар ҙә партия уҡыуҙарының төрлө формалары менән солғап алынды. Политик уҡыу формаларын билдәләгәндә партия ойошмаһы һәр бер коммунистың [illegible] иҫәпкә алды. [illegible] Был семинарҙа 51 коммунист ҡатнаша. Бынан тыш, ВКП(б) ҡала комитете эргәһендәге марксизм - ленинизм университетенда — 9, район партия мәктәбендә — 3, политик мәктәптә — 18 һәм ВКП(б) тарихе [illegible] түңәрәктәрендә 101 кеше уҡый. Ҡалған коммунистар политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә үҙ алдарына эшләйҙәр.

Иң мөһиме бында хәҙер коммунистар политик уҡыуға үҙҙәренең ҡараштарын бөтөнләй үҙгәрттеләр, идея-политик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә серьезыраҡ һәм яҡшыраҡ эшләй башланылар. Етәксе кадрҙарҙың марксистик-ленинсе белем кимәлдәрен күтәреүгә бигерәк тә ныҡ иғтибар бирелә. Коммунистар семинарҙарға әҙерләнгән ваҡытта Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин әҫәрҙәрен ныҡлап өйрәнәләр. [illegible] Журавлев, Гильченко, Максимов, Шекунов иптәштәр айырыуса ныҡ әҙерләнәләр һәм занятиеларҙа актив рәүештә ҡатнашалар.

Партбюро коммунистарҙың большевизм теорияһын һәм тарихын өйрәнеүҙәре өҫтөнән ныҡлы контроль булдырған. Өйрәнелә торған һәр бер материалды коммунистарҙың нисек үҙләштереүҙәре тикшерелә.

Былар — яңыса эшләүҙең тәүге аҙымдары ғына әле. Партбюроның бурысы — [illegible] йыйылыштарының һәм партия өлкә конференцияһының күрһәтмәләре нигеҙендә коммунистарҙы политик тәрбиәләү эшен тағы ла яҡшыртыуҙан тора.

З. Нәфиҡов.

Йәш коммунистар менән эшләүҙең һөҙөмтәләре

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы машина-трактор станцияларының эшен яҡшыртыуҙы төп бурыстарҙың береһе итеп ҡуйҙы. Был мөһим талапты үтәү МТС партия ойошмаларының ойоштороу һәм массовый-политик эштәренең кимәленә ныҡ бәйләнгән. Ә партия ойошмаһы үҙенең коммунистары идея-политик яҡтан сыныҡҡан, партия политикаһы менән ныҡлы ҡоралланған саҡта ғына был мөһим бурыстарҙы үтәүгә һәләтле буласаҡ.

Бөрө МТС-ының партия ойошмаһында коммунистарҙың 90 проценте партияға тик һуңғы йылдарҙа ғына ингән йәш иптәштәр. Шуға күрә партия ойошмаһы уларҙы тәрбиәләү буйынса өҙлөкһөҙ эш алып бара.

Бөтә ВКП(б) члендәре һәм кандидаттары партия уҡыуҙары менән солғап алынды. Күптән түгел иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү түңәрәге үҙенең эшен тамамланы. Занятиелар ныҡлы әҙерлек менән, тыңлаусыларҙың актив ҡатнашлығында үткәрелде. Коммунистарҙан А. Д. Чиглинцев, А. Б. Ковригин, Л. А. Русалкин, М. И. Литвинов иптәштәр материалды айырыуса яҡшы үҙләштерҙеләр. Хәҙер улар өсөн ВКП(б) тарихен өйрәнеү түңәрәге һәм политик мәктәп ойоштоголоп, уҡыуға 26 кеше йәлеп ителде. Өс коммунист район партия мәктәбендә уҡый. ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын 6 коммунист үҙ алдына өйрәнә. Уларға ярҙамға лекция, консультациялар үткәрелә.

Коммунистарҙы большевистик тәрбиәләү мәктәбе булған партия йыйылыштары регуляр рәүештә үткәрелә. 1947 йылда 25 тапҡыр партия йыйылыштары үткәрелеп, уларҙа 62 мәсьәлә ҡаралды. Йыйылыштар алдан ныҡлы әҙерлек менән, коммунистарҙың актив ҡатнашлығында үткәрелә.

Партия поручениелары коммунистарҙы тәрбиәләүҙә бик мөһим урын тота. Бында 18 коммунист агитатор булып эшләй, ҡалғандары айырым эш участкаларына беркетелгәндәр.

Тәрбиә эштәрен түҙемле рәүештә алып барыу коммунистарҙың активлегең үҫтерҙе. уларҙың производствола авангардлыҡ ролдәрен күтәрҙе. Коммунистар, тапшырылған эш өсөн ысын мәғәнәлә яуаплылыҡ һиҙеп производствола яҡшы өлгө күрһәтәләр. Ремонтта эшләүсе 26 коммунист бирелгән планды 150—200 процентҡа еткереп үтәне. Ковригин, Денисов, Рябов һәм Баландин иптәштәр айырыуса матур хеҙмәт өлгөһө күрһәттеләр. Һөҙөмтәлә МТС ремонт эштәрен уңышлы рәүештә тамамлауға өлгәште. Был — коммунистарҙы тәрбиәләү буйынса алып барылған ныҡышмалы эштең гүзәл һөҙөмтәһе булып тора.

С. Сәғитов.

Бөрө МТС-ы директорының политик эш буйынса урынбаҫары.

Черниковск ҡалаһы нефть эшкәртеү заводының парткабинеты. Һүрәттә: Заводтың йәш эшселәре И. М. Левит һәм К. Д. Попова иптәштәр эштән буш ваҡыттарында газета, журналдар уҡыйҙар.

С. Буравин фотоһы.

Сәсеү алды уйҙары

«Ярыш» колхозы председателе иптәш Фәттәхов 80 йәшлек колхозсы Мәхәтдин Ғәйнуллин менән бәседә алып бара. Ҡарт үҙенең игенселектәге эш тәжрибәһе, юғары урожай алыу юлдары тураһында һөйләй.

— Беҙ сәсеү осоронда һине баҫыуҙа эштең сифатын тикшереп тороу өсөн йәш һабансылар араһында эшләргә ҡуйырға уйлайбыҙ, — тине уға колхоз председателе.

Бик ризамын, ғүмер буйына баҫыуҙа иген иккән кешегә келәттәр һаҡлап ултырыу күңелле түгел, — тип яуап бирҙе ҡарт, шатланып.

Быйыл яҙ колхозға 130 гектар майҙанды һөрөп сәсергә тура киләсәк. Колхоздың 10 һабаны, 30 баш эш аты, егергә өйрәтелгән дүрт эш үгеҙе бар. Иптәш Фәттәхов быны ошо көс менән 18—20 көнгә планлаштырылған яҙғы сәсеү эштәрен, иисек итеп 4—5 көнгә булһа ла ҡыҫҡартыу тураһында баш вата. Ул яҙ көнө сәсеүҙе 2—3 көнгә генә иртәрәк тамамлағанда ла, байтаҡ өҫтәмә урожай алырға мөмкин икәнен яҡшы белә. Бына һабансыларҙы саҡырып алды. Улар менән үҙенең фекерен уртаҡлаша, һабансыларҙан кәңәш һорай. Уҙған йыл сәсеү осоронда көн һайын 1,7 гектар ер һөргән иптәш Фәхертдинов был кәңәшмәлә:

— Мин уҙған йыл норма буйынса 0,8 гектар урынына, 1,7 гектар ер һөрҙөм. Ә быйыл көн һайын икешәр гектар ер һөрергә һүҙ бирәм, — ти. Уның менән ярышып эшләгән, уның һымаҡ икешәр норма биргән һабансы иптәш Килмөхәмәтов быйыл бригадир итеп үрләтелгән. Ул етәкселек иткән бригада сәсеүгә әҙерлекте лә беренсе булып тамамланы. Ул үҙ бригадаһында һабансылар һәм тырмасылар итеп иң алдынғы колхозсыларҙы билдәләне. Эш нормалары, индивидуаль сдельщинаның өҫтөнлөгө тураһында улар менән бәседәлар үткәрҙе.

Уҙған йылда колхозсылар баҫыу эштәрен районда беренсе булып тамамлағайнылар. Көҙ яуын алып үҫкән бойҙай, һоло, арпа сәсеүлектәрендә ҡый үләне лә булманы. Колхозсылар гектарынан кәмендә 20-шәр центнер урожай өмөт иттеләр. Ләкин, Урал аръяғы тәбиғәтенең каприздәре күп көс түгелтән хеҙмәттең тейешле һөҙөмтәләрен бирмәне. Ашлыҡтарҙы ҡырау һуҡты. Бары тик айырым участкаларҙан ғына 17—18-әр центнер урожай алынды.

Быйыл иген өсөн көрәштең хәл иткес йылы. Уҙған йылғы хаталарҙы ҡабатламау өсөн быйыл сәсеү эштәрен тағы ла ҡыҫҡараҡ сроктарҙа үткәрергә тура киләсәк. Колхоз председателе иптәш Фәттәхов һәм колхозсылар бына хәҙер ошо турала уйлайҙар һәм ҙур һөжүмгә әҙерләнәләр.

М. Хәйҙаров.
Учалы районы.

Етешһеҙлектәр бөтөрөлә

ВЛКСМ-дың Дүртөйлө район комитетының рейд бригадаһы «Волга» колхозының яҙғы сәсеүгә әҙерлеген тикшерҙе һәм байтаҡ етешһеҙлектәрҙе асты.

Колхоздың сәсеүгә әҙерлеге ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған. Звенолар формаль рәүештә комплектовать ителгәндәр, звеноводтар үҙҙәренә беркетелгән ер участкаларын белмәйҙәр.

Сәсеү планын үтәү өсөн 300 центнер һоло һәм 300 центнер бойҙай орлоғо талап ителә. Ләкин 150 центнер генә бойҙай туплалған. Шулай уҡ борсаҡ орлоғо ла етешмәй. Орлоҡтарҙы таҙартыу, сәсеү кондицияһына еткереү аҡрын бара. Ауыл хужалығы машиналарын, инвентарь һәм сбруйҙарҙы әҙерләү эшендә лә етешһеҙлектәр күп.

Рейд бригадаһы тарафынан асылған етешһеҙлектәр колхоз комсомолецтәре йыйылышында һәм колхозсылар араһында өйрәнелде. Һөҙөмтәлә комсомолецтар инициативаһында сәсеүгә әҙерлек буйынса махсус субботниктар ойошторолдо. 22 мартта ойошторолған субботникта 82 кеше ҡатнашты һәм улар баҫыуға 289 йөк тиреҫ сығарҙылар, бөтә машиналарҙы һәм инвентарҙарҙы йыйнанылар.

Алтай крайы игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хатын өйрәнгәс, колхозсылар быйыл һәр гектарҙан 14,5-әр центнер урожай йыйнарға йөкләмә алдылар һәм социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр.

Рейд бригадаһы:

М. Мөхәмәтғәлин (ВЛКСМ район комитеты), Н. Мансурова («Ярыш» газетаһы редакцияһы), М. Шәрипова («Волга» колхозының комсомол ойошмаһы).

Әҙерлек тәүәлләнде

Бозаяҙ районы «Алға» колхозының сәсеү майҙаны һуғышҡа тиклем кимәлдән байтаҡ артты. 1941 йылда 390 гектар иген сәселһә, 1947 йылда 410 гектарға еткерелде. Ә 1948 йылда сәсеү майҙаны тағы ла киңәйтелә. Тик бойҙай культураһы ғына ла 70 гектарға арта.

Был колхоз яҙғы сәсеүгә яҡшы әҙерләнде. Сәсеү майҙанына етерлек орлоҡ әҙерләнеп ҡуйылды. Бөтә төр ауыл хужалығы инвентарҙары ремонтланды. Ҡышҡы агротехник саралар планы үтәлде. Һәр гектарҙан 30-ар центнер, урожай үҫтерергә йөкләмә алған звенолар үҙҙәренә беркетелгән участкаларҙа ҡар тоттолар, тиреҫ сығарҙылар һәм ужымдарҙы аҙыҡландырыу өсөн етерлек көл һәм ҡош тиҙәге әҙерләнеләр.

Р. Усманов.

Колхоздарҙы электрләштереүгә иғтибарҙы көсәйтергә

Стәрлетамаҡ районы колхоздары промышленность предприятиеләренең ярҙамында электрификация эшен йәйелдерҙеләр. «9 май», «Смычка», «Дружба» һәм «Доброволец» колхоздарында электр энергияһы яҡтылыҡ өсөн генә түгел, колхоздарҙың производство тармаҡтарында ла киң рәүештә ҡулланыла.

Хәҙер районның 10 колхозы электрләштерелгән. Быйыл тағы ла 22 колхоз электрләштерелергә тейеш.

Ләкин электрификация эшенә ныҡлы иғтибар итмәүсе колхоздар ҙа бар. Мәҫәлән, Свердлов исемендәге колхоз һуғышҡа тиклем үк яҡшы эшләгән, унан һуң ватылған үҙ электр станцияһын һаман да аяҡҡа баҫтырыу сараһын күрмәй. Былтыр уҡ электрләштерелергә планлаштырылған «Просвет», «Яңауыл» һәм Карл Маркс исемендәге колхоздар быйыл да электр линияһы үткәреү сараһын күрмәйҙәр. Ә «Новое русло» колхозында электр үткәреү өсөн былтыр әҙерләнгән 90 дана бағана икенсе маҡсатҡа тотолған.

«Большевик» колхозын электрләштереү өсөн 1.400 метр оҙонлоҡта ғына линия үткәрергә кәрәк. Уның материалдары ла әҙер. Ләкин эш алып барылмай.

Был хәлде тик шуның менән генә аңлатырға мөмкин: электрификация хеҙәк бик мөһим эш районда баһаланмай. Колхоз етәкселәре лә, район ойошмалары етәкселәре лә колхоздарҙы электрләштереү эшен үҙ ағышына тапшырғандар. Айырыуса райплан эшлекһеҙлек күрһәтә. Ул кисекмәҫтән колхоздарҙы электрләштереү буйынса етәкселекте көсәйтергә, уларға ныҡлы ярҙам күрһәтергә бурыслы.

Ғ. Ибраһимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

АУЫЛ ҺӘМ ПОСЕЛКА СОВЕТТӘРЕ ПРЕДСЕДАТЕЛДӘРЕ ӨСӨН СЕМИНАР

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Белорет район Советы башҡарма Комитеты ошо көндәрҙә ауыл һәм поселка Советтәре председателдәре һәм секретарҙары өсөн биш көнлөк семинар үткәрҙе. Семинарҙа ҡатнашыусылар «Социалистик государство тураһында Ленин—Сталин учениеһы» тигән темала, Сталиндың биографияһы тураһында лекция һәм халыҡ-ара хәл тураһында доклад тыңланылар. Шулай уҡ культура-ағартыу эштәрен йәйелдереү саралары һәм балалар мәсьәләһе буйынса докладтар булды.

Семинарҙа ҡатнашыусылар лекцияларҙы һәм докладтарҙы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар һәм улар «Диңгеҙҙәгеләр өсөн», «Белый клык» һәм башҡа кино картиналарын ҡаранылар.

М. Иргалин.

Һәр бер колхозда умартасылыҡ булдырырға!

Умартасы Хәбиб

Тирә-яҡ колхоздарҙа ла, районда үҙендә лә умартасылыҡ тураһында һүҙ сыҡһа, һәр ваҡыт беренсе итеп умартасы Хәбибте телгә алалар.

— Умарталыҡтың бүлтәс, «Ирк» колхозыныҡы кеүек булһың ине, Хәбиб ҡарт бер үҙе генә колхозға шундай күп доход килтерә, — тиҙәр колхозсылар.

Ул 1937 йылда был эште ойоштороп ебәргәндә колхоздың иң барлы 15 кенә күс бал ҡорто бар ине. 10 йыл ваҡыт эсендә колхозсы Баһауиев Хәбиб бик бай тәжрибә тупланы. Умарталарҙың һаны ла, уларҙың бал биреүе лә йылдан-йыл арта бара. 1946 йылда һәр бер умартанан 57-шәр килограмм бал алынды. Уҙған йыл бал ҡорттары өсөн уңайлы булманы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тәжрибәле Хәбиб һәр бер умартанан 33-әр килограмм урынына, 43-әр килограмм бал алып, планды арттырып үтәне. Һис ҡасан да бер күс тә үлгәне юҡ. Бөгөнгө көндә колхоздың 60 күс умарта ҡорто бар.

— Уҙған йыл 24 июлдән 26 августҡа тиклем генә бал алырға мөмкин булды. Был бер ай ваҡыттың һәр бер сәғәтен һәм минутын тулыһынса файҙаланмағанда, бөтөнләй балһыҙ ҡалыу ҡурҡынысы бар ине, — ти ул, үҙенең эш тәжрибәһе тураһында һөйләгәндә.

Яҙ яланға сығарып ултыртыу менән, умарталар таҙартылалар, бал ҡорттарын хәлләндереү өсөн шәкәрле һыу бирелә. «Ирк» колхозының умарталары иртә яҙ уҡ төрлө сәскәләргә күмелгән урман эсендәге аҡланға ултыртыла. Тирә-яҡтан уратып алған йыш ағастар[illegible] ел үтә алмай бында. Бынан башҡа Хәбиб йыл һайын умарталыҡ тирәһенә донник кеүек ҡиммәтле үләндәр, көнбағыш, горчица культуралары сәсә. Был үләндәрҙән ҡорттар бөтә йәй буйына тулыһынса файҙаланһын өсөн, үләндәр өс срокта сәселә. Бер майҙан үләненең сәскәләре шиңеүгә, икенсе һәм унан һуң өсөнсө майҙанда сәскәләр өлгөрә.

Хәбиб Баһауиев ҡайһы умартаҡасан бала айырасағын алдан белеп тора. Ә ваҡыт килеп еттеме, һағалап ҡына тора ла, сығып килгән ҡорт иңәһен тубалға бикләп тә ҡуя. Инәләре булмағас, ҡорттар бер ҡайҙа ла китә алмайҙар, шунда уҡ һарырға мәжбүр булалар. Бына шулай эшләү арҡаһында бында бер генә күс ҡорт та ситкә осоп киткәне юҡ.

Умартасылыҡтың иң яуаплы һәм ауыр осоро — ҡышлатыу һәм яҙ һаҡлау, умартасы омшаникте бик яҡшылап таҙарта, ремонт үткәрә. Һауа алыштыра торған торбаларҙың төҙөк булыуына айырыуса ныҡ иғтибар бирелә. Көйә ауыҙына ҡорттар һыйырлыҡ ҡына ярыҡ ҡалдырылып, ҡалай ҡаҙаҡлана. Был, умарта эсенә сысҡан инеүгә мөмкинлек бирмәй.

«Ирк» колхозында умартасылыҡты артабан үҫтереү һәм унан тағы ла күберәк доход алыу өсөн быйыл күп кенә эштәр башҡарыласаҡ. Бының өсөн үткән йәйҙә уҡ яңы 20 умарта һатып алынды. Әлегә тиклем умарталарҙы ҡышлатыу өсөн уларҙы 3 километр алыҫлыҡтағы ауылға ташып мәшәҡәтләнергә тура килә ине. Быйыл умарталыҡтың үҙендә 100 баш умарта һыйҙырышлы омшаник төҙөләсәк.

Х. Атангулов.
Дәүләкән районы.

Мөмкинлектәрҙе файҙаланырға

Умартасылыҡ — республикабыҙ ауыл хужалығының мөһим тармағы. Ул колхоз хужалығына ҙур доход килтереү менән бергә, урожайҙы күтәреүгә лә ныҡ ярҙам итә.

Хужалыҡтың был тармағына ныҡлы иғтибар биргән колхоздарҙа хеҙмәт көндәренә йыл һайын күп кенә бал бүлеләләр һәм хужалыҡтың аҡсалата доходын арттыралар. Яңауыл районы «Ҡыҙыл ударник» колхозында [illegible] 118 күс умарта бар ине. Колхоздың тәжрибәле умартасыһы иптәш Хәкимов бер йыл эсендә уларҙың һанын 133-кә еткерҙе һәм һәр бер умартанан 57-шәр килограмм бал алды. Уға был уңышлы эш өсөн хеҙмәт көненә өҫтәмә түләү тәртибендә 360 килограмм бал бирелде.

Нуриман районы «Ҡыҙыл болот» ауыл хужалыҡ артеленең умартасы иптәш Зәйнуллин Нуриәхмәт үҙ эшен белеп, намыҫ менән башҡара. Уҙған йылда ул 143 күс умарта булып, бер йыл эсендә уларҙы 203-кә еткерҙе. Бал алыу планы 180 процентҡа үтәлде. Был өсөн иптәш Зәйнуллинға өҫтәмә түләү тәртибендә 274 килограмм бал бирелде. Дүртөйлө районы «Герой» колхозы 59 күс умартанан бөтәһе 58 центнер бал алды.

Алдынғылар был уңышҡа ҡорт семьяларын юғалтмайынса ҡышлатып сығарыу, уларҙы етерлек аҙыҡ запасы менән тәьмин итеү һәм дөрөҫ тәрбиәләү һөҙөмтәһендә ирештеләр.

Йомағау умартасылыҡ техникумының күп йыллыҡ тәжрибәләре һәм һынауҙары республикабыҙҙың тәбиғи шарттарында юҡә сәскәһенең бик күп бал биреүен күрһәттеләр. Юҡә сәскә атҡан осорҙа һәр бер ҡорт семьяһы 24, 35-әр килограмм [illegible] бал йыя ала. [illegible] тәбиғи шарттар бөтә районлауҙа ла бал ҡорттарын үрсетеүгә һәм улар хужалыҡ доход биреүен күтәреүгә тулы мөмкинлектәр булыуын күрһәтә. Был мөмкинлектәр тулыһынса файҙаланылмай. [illegible]

Бөйөк Ватан һуғышына тиклем республикабыҙҙа умартасылыҡ ныҡ алға китмәне. Башҡорт балы бөтә Союз буйынса маҡтаулы [illegible]. Бурыс — республикабыҙҙың [illegible] умартасылыҡты колхоздарҙа ҙур доход биреүсе мөһим тармаҡҡа әйләндереүҙән тора. Быйыл бал ҡорто күстәрен 30 процентҡа арттырыу, һәр бер умартанан уртаса 36-шар килограмм бал һәм 600-әр грамм балауыҙ алыу бурысы ҡуйыла.

Агроном Ә. Әхтәмов.

Һүрәттә: Баҡалы районы «Память Ленина» колхозының умартасылыҡ фермаһы мөдире иптәш Н. И. Марков.

В. Жданов фотоһы.

Бал ҡорто күстәрен яҡшы һаҡларға

Тәбиғи шарттарҙың айырыуса уңайлы булыуы, бигерәк тә юҡә ағастарының күп үҫеүе Баҡалы районы колхоздарында умартасылыҡты үҫтереүгә ҙур мөмкинлектәр бирә.

Был мөмкинлектәрҙе файҙаланып, умартасылыҡты үҫтереүгә ныҡлы иғтибар биргән колхоздар был тармаҡтан йыл һайын бик ҙур доход алып киләләр. Мәҫәлән, «Память Ленина» колхозында хәҙер умарталар һаны 556 башҡа етте һәм уҙған йыл һәр бер умартанан 34-әр килограмм бал, берәр килограмға яҡын балауыҙ алынды. Умартасылыҡ фермаһы мөдире иптәш Марков быйыл һәр бер умартанан 50-шәр килограмм бал һәм 1 килограмм 300 грамм балауыҙ алыу өсөн көрәшә. Бал ҡорттары яҡшы шарттарҙа ҡышлайҙар. Яҙ көнө умарталыҡҡа сығарыу менән ҡорттарҙы ашатыу өсөн етерлек бал запасы бүлеп ҡуйылды.

«Красный яр» колхозының умартасыһы иптәш Сурьяненова бер йыл эсендә 18 баш умартаны 27 башҡа еткерҙе һәм һәр бер умартанан 46-шар килограмм бал һәм 800-әр грамм балауыҙ алды. Ә быйыл ул умарталар һанын 35 башҡа еткерергә һәм һәр бер умартанан 60-ар килограмм бал алырға һүҙ бирҙе.

Ләкин күпселек колхоздарҙа был мөһим эште баһалап еткермәйҙәр әле. Шуға күрә лә уҙған йыл умартасылыҡ үҫтереүҙең государство планы үтәлмәне, бал алыу ҙа түбән булды. Район ауыл хужалығы бүлеге, бигерәк тә уның умартасылыҡ буйынса агрономдары Асанбаев һәм Туганова иптәштәрҙең был эште үҙ ағышына ҡуйыуҙары һөҙөмтәһендә ҡайһы бер колхоздарҙа умарталарҙы арттырыу урынына, кәметеүгә юл ҡуялар. Миҫал өсөн «Красный боец» колхозын алырға була. Бында ҡышлатыуҙы насар ойоштороу арҡаһында 34 баш умарта күсенең 29-ы үлгән. «Победа», «Челюскинсе» колхоздарында ла бик күп бал ҡортоноң үлеүенә юл ҡуйғандар.

Х. Ғәлимов.

Ҡала общественносының намыҫ эше

Ошо йылдың 9 мартында хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советының икенсе сессияһы 1948 йылда ҡаланы төҙөкләндереү һәм яңы торлаҡтар төҙөлөшө планын раҫланы. Был план буйынса төҙөкләндереү эшенә бюджеттан 13 миллион 141 мең һум аҡса ебәрелде. Унан тыш нефть промышленносе, ҡаланың промышленность предприятиелары тарафынан һигеҙ миллион һумдан артығыраҡ средство ебәрелә. Ә бөтәһе ҡаланы төҙөкләндереүгә 21.361 мең һум аҡса билдәләнә.

Торлаҡ фондтарына капиталь һәм ағымдағы ремонт үткәреү буйынса ла ҙур ғына эштәр ҡаралды. Мәҫәлән, Туҡай урамында 18 квартиралы коммуналь торлаҡ йорто һалынырға, специалистар, медиктәр йортона, шулай уҡ Ленин, Киров, Жданов һәм Молотов райондарында бөтәһе 103 йортҡа капиталь ремонт үткәрелергә тейеш.

Шулай итеп, быйыл торлаҡ фондына капиталь һәм ағымдағы ремонт үткәреүгә өс миллион ете йөҙ мең һумдан артығыраҡ средство ебәрелә. Ҡала торлаҡ управлениеһе һәм район Советтәре ебәрелгән был ҙур средствоны тулыһынса һәм урынлы файҙаланыуҙа эшлеклелек күрһәтергә бурыслылар.

Билдәләнгән төҙөлөш һәм ремонт эштәренең күләме ҙур. Шуның өсөн дә ҡала Советы исполкомы ремонт-төҙөлөш эштәрен башҡарыу өсөн ҡала ремонт-төҙөлөш тресы ойошторҙо. Был трестың, район Советтәре исполкомдарының һәм ҡала торлаҡ управлениеһының етәкселәре төҙөлөш һәм ремонт эштәренә әҙерлекте күптән үк йәйелдереп ебәрергә һәм хәҙер уны тамамларға тейеш инеләр. Ләкин һиҙелерлек эштәр күренмәй әле. Ремонт-төҙөлөш тресының 700 урынына бары тик 100 эшсеһе бар. Ә төҙөлөш һәм ремонт эштәрен уңышлы башҡарыу өсөн беренсе нәүбәттә етерлек һанда эшсе көсө булдырыу талап ителә. Трестың управляющие иптәш Киреев быны аңларға теләмәй күрәһең. Ҡала Советы исполкомы тарафынан рөхсәт ителеүгә ҡарамаҫтан, уның эшселәр һайлап алыу эшен ошоға тиклем ойошторамауы шул турала һөйләй. Ҡалалағы райсовет исполкомдарының да эшселәр һайлап алыуҙы ойоштороуға яуапһыҙ ҡарағанлыҡтарын әйтергә кәрәк. Ә ҡала торлаҡ управлениеһы начальнигы вазифаһын үтәүсе иптәш Багин ойошҡан рәүештә эшселәр һайлап алыу мәсьәләһендә бер төрлө лә сара күрмәй.

Бындай хәлгә артабан түҙеп тороп булмай. Эшселәрҙе ойошҡан рәүештә һайлап алыу һәм уларға дөйөм торлаҡтар әҙерләү эше тиҙ көндәрҙә тамамланырға тейеш.

Урамдарға һәм тротуарҙарға асфальт түшәү ҡаланы төҙөкләндереүҙә мөһим сараларҙың береһе. Шуның өсөн дә ҡала Советы сессияһы үткәрелергә тейеш булған был эштең күләмен һәм средство билдәләүҙе үткән йылға ҡарағанда байтаҡ арттырҙы. Быйыл урамдарға бөтәһе 17900 квадрат метр күләмендә асфальт түшәү үткәреләсәк. 11200 квадрат метр тротуарға асфальт түшәү билдәләнде. Беренсе нәүбәттә Ленин, Пушкин, Совет, Карл Маркс, Октябрьский, Зенцов, Киров урамдарының тротуарҙары асфальтҡа ҡапланасаҡ. Былардан тыш тротуарҙарға асфальт түшәүҙә промышленность предприятиелары ла ҡатнашалар. Уларҙың көсө менән 16400 квадрат метр тратуарға асфальт түшәлергә тейеш.

Ҡала урамдары юлдарына таш түшәү, соҡорҙарҙы тигеҙләү, Чкалов һәм Куштаренко трактыларының ҡалаға инә торған урындарын тәртипкә килтереү, юлдарға ҡырсын-ҡом түшәү буйынса билдәләнгән эш күләмдәре лә ҙур. Был эштәрҙә лә промышленность предприятиелары ҡатнашалар. Уларҙың көсө менән 17500 квадрат метр юл тәртипкә килтерелергә тейеш.

Урам, тротуар һәм юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса билдәләнгән был саралар беҙҙе ҡәнәғәтләндерәме? Юҡ, әлбиттә. Сөнки ҡаланың урамдары, тротуарҙары насарлығы һәр кемгә билдәле. Шуның өсөн дә промышленность предприятиеларының һәм учреждениеларҙың етәкселәре билдәләнгән эштәрҙе башҡарыу менән генә сикләнмәйенсә, тротуар һәм урамдарҙы төҙөкләндереү эшен киңәйтеүгә өҫтәмә сығанаҡтар эҙләргә һәм табырға тейештәр. Ә инициатива күрһәткәндә быны эшләп була. Шуның менән бергә горкомхоз, райсовет һәм предприятие етәкселәре юл һәм тротуарҙы төҙөкләндереү эшенә талап ителгән ҡырсын, ҡом, ваҡланған таштың һәм башҡаларҙың 50 процентен әҙерләп, хәҙерҙән ташып ҡуйырға тейештәр. Сөнки яҙ етеү менән эште ойошҡан рәүештә башларға кәрәк буласаҡ.

Өфө, Черниковск ҡалаларының хеҙмәтсәндәрен, шулай уҡ промышленность предприятиеларын һыу менән тәьмин итеү яуаплы бурыс булып тора. Шуның өсөн дә был сараға байтаҡ средство бүленде. Ағымдағы йылда икенсе линияла тугыҙ мең пагон метр оҙонлоғонда торба һалыу үткәреләсәк. Был сара авария ҡурҡынысы булған урындарҙы уратып үтеүгә мөмкинлек бирәсәк. Һыуҙы бүлеү селтәрен 1200 пагон метрға оҙайтыу күҙҙә тотола. Яңынан 15 урында һыу колонкаһы төҙөләсәк. Карл Маркс урамындағы 15, 17, 19-сы номерлы йорттарҙа водопровод аяҡҡа баҫтырыла һәм Ленин урамындағы 9-сы номерлы йорттоң водопроводына ведомстволар ҡарамағында булған 17 йорт ҡушыла.

Билдәләнгән эштәр ҙур һәм быйылдың өҫтәүенә үткән йылдан күскән төҙөлөштәрҙе лә тамамларға кәрәк. Ләкин был эштәрҙе башҡарыу йөкмәтелгән ойошмалар бик аҡрын ҡуҙғалалар әле. Иптәш Наконечный етәкселек иткән төҙөлөш ойошмаһы Чернышевский менән Аксаков урамы араһында водопровод төҙөү эшен һуҙып килә. Ленин урамын аша үткәреү урынында ла эште тамамламаған. Көҙ көнө улар ер туңыуын көттөләр. Ләкин ер туңғас та эштә бер төрлө лә һынылыш булманы. «Башстройтрест» етәкселәре икенсе линия водопровод төҙөү эшен бик аҡрын алып баралар. Ә «Востоконефтепроводстрой» управлениеһе был эшкә бөтөнләй башламаған. Канализация коллекторҙары эшләү бурысы йөкмәтелгән резина, агрегат заводтарының етәкселәре Торопыгин һәм Советов иптәштәр ҙа иң өсендәр ҡуҙғала алмаусылыҡ күрһәтәләр. Мөһим эшкә бындай яуапһыҙ ҡараш һис кисекмәҫтән бөтөрөргә кәрәк.

Шулай уҡ ҡаланы йәшелләндереүгә һәм электрләштереүгә, бигерәк тә ҡала ситендәге Окружная урамын, Сафрон слободаһын, Пугачев һәм Кооператив поляналарын, Октябрьск ҡасабаһын һәм башҡаларҙы электрләштереүгә айырыуса иғтибар бирелә. Баҙар майҙандарын тәртипкә килтереү, халыҡты культура һәм көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереү эштәрен яҡшыртыу буйынса ла күп саралар билдәләнә. Был өлкәлә билдәләнгән сараларға күп средство бүленә.

Башҡалабыҙҙы төҙөкләндереү буйынса билдәләнгән саралар ҙур. Ҡаланың совет, партия ойошмаларының, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының, промышленность предприятиелары һәм учреждениеләре етәкселәренең бурысы төҙөкләндереү планы буйынса билдәләнгән сараларҙы үтәү генә түгел, бәлки арттырып үтәү өсөн тағы ла яңы сығанаҡтар табыуҙан һәм уларҙы тормошҡа ашырыуҙан тора. Халыҡ араһында массовый-политик эште киң йәйелдереп, төҙөкләндереү планын үтәүгә ҡаланың бөтә общественносын күтәреүгә, хеҙмәткә яраҡлы һәр бер кешенең төҙөкләндереүҙә бик эш көнө эшләүенә өлгәшергә кәрәк. Сөнки башҡалабыҙҙы төҙөкләндереү ҡала общественносының намыҫ эше булып тора.

Партия һәм хөкүмәт ҡалабыҙҙы төҙөкләндереү эшенә бик күп средстволар ебәрә. Был, ҡала халҡын культура һәм көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереүҙә күрһәтелгән ҙур хәстәрлекте күҙәләйләрә. Ҡала партия, совет, комсомол һәм профсоюз ойошмалары был хәстәрлектең әһәмиәтен хеҙмәтсәндәргә тәрән итеп аңлатырға һәм шул нигеҙҙә ҡаланы төҙөкләндереү буйынса социалистик ярышты киң йәйелдереп ебәрергә тейештәр. Сөнки беҙҙең бөтә эштәребеҙҙе уңышлы үтәүҙә һыналған метод — социалистик ярыш нигеҙендә эшләү башҡалабыҙҙы төҙөкләндереүҙә уңышты тәьмин итеүҙә лә көслө рычаг булып торасаҡ.

Башҡалабыҙҙы — тәҙек, матур ҡала итәйек! Шул лозунг аҫтында ҡалалағы райондар, предприятиелар, учреждениелар коллективтары, йорт управлениелары, квартәлдар араһында социалистик ярышты киң йәйелдереп ебәрәйек. Ҡала райондарының партия райкомдары һәм райсовет исполкомдары был ярышты ойоштороpға, коммуналь хужалыҡтарҙың, төҙөкләндереү эшенә ылыҡтырылған төҙөлөш ойошмаларының һәм промышленность предприятиеларының эштәренә өҙлекһеҙ контроль алып барырға бурыслылар.

Н. Егоров,
Өфө ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫары.

Германияның Көнбайыш зоналарында „Эшселәр батальондары" маскаһы аҫтында хәрби формированиеләр

БЕРЛИН, 29 март. (ТАСС). Германиялағы совет хәрби администрацияһы информацион бюроһының белдереүе матбуғатта баҫылып сыҡты. Был белдереүҙә Германияның Англия оккупацияһы зонаһындағы «эшселәр батальондары», тип атала торған батальондарҙың хәрәкәтенә ҡарата яңы фактылар килтерелә.

Белдереүҙә уголовный енәйәтселәр — Штуббенең, Шольцтең һәм Бранерҙең күрһәтеүҙәре килтерелә. Улар йәшерен рәүештә демаркацион һыҙыҡты үтеп сыҡҡандар һәм Совет зонаһында бик күп һанда банда ойоштороп, халыҡҡа һөжүм иткәндәр һәм талағандар.

Совет зонаһының немец сик буйы полицияһы тарафынан ҡулға алынған банда етәксеһе Штуббе һорау алыу ваҡытында, 1948 йылдың ғинуар айында йәшерен рәүештә Британия зонаһына сыҡҡанлығын һәм унда Британия оккупацион властары тарафынан төҙөлгән һәм «немец эшселәр батальондары» исеме аҫтында билдәле булған яңы хәрби ойошмаға ылыҡтырылыуы тураһында белдерҙе.

«Британия һәм Америка зоналарында эш таба алмағас, — тип күрһәтте Штуббе, — мин Англияның хеҙмәт биржаһы аша Виттгенштейнгә яҡын (Вестфалия) Ауэлә урынлашҡан 909-сы номерле «немец эшселәр батальонына» ебәрелдем. Батальонда 353 кеше бар һәм уның менән элекке немец армияһының обер-лейтенанты Нессе етәкселек итә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә Англия формаһында кейенгән, казарма тәртибендә йәшәйбеҙ, хәрби дисциплинаға буйһонабыҙ һәм батальон кухняһынан туҡланабыҙ. Беҙҙең батальоныбыҙ Англияның «Рейн армияһына» буйһона һәм элекке немец армияһының 16 йәштән алып 40 йәшкә тиклем булған хәрби хеҙмәткәрҙәренән тора. Англияның король армиялары капитаны мистер Томсон батальон өҫтәнән күҙәтеү алып барҙы һәм уның менән етәкселек итте.

Батальон командиренең рөхсәтенән башҡа казармаларҙан сығып йөрөү рөхсәт ителмәне. Батальонда советҡа ҡаршы һуғышсанлыҡ рухы хакимлыҡ итте. Батальон сафындағыларҙың күпселеге элекке Германия армияһының офицерҙарынан һәм элекке Гитлер партияһы члендарынан тора.

Батальондың сафы йыш ҡына үҙгәреп тора, сөнки инглиздәр элекке летчиктәрҙе һәм хәрби моряктарҙы Британияның һауа һәм хәрби-диңгеҙ флотына алалар. Батальонда булған сағымда мин был батальонда бер немецте күрҙем, ул һуңғараҡ Британия формаһында кейенеп, беҙҙең янға килде. Ул, Британия ғәскәренә алынған кешеләр инглиздәр файҙаланған хоҡуҡтар менән файҙаланалар һәм ике йылдан һуң Британия кешеһе була алалар, тип һөйләне.

Беҙҙең батальондан американдар Грецияға ебәреү өсөн телмәсселәрҙе һайлап алдылар. Батальон командире һуғыш була ҡалһа, «эшселәр батальондары» ҡоралландырыласаҡтар һәм Англия яғында файҙаланыласаҡтар, тип әйтә ине.

Эшсе батальоны исемен аҡлау өсөн, уларҙы ағас ҡырҡыуҙа файҙаланалар».

Штуббе шунан ары, үҙендә Британия оккупацион державаһы вәкилдәренең командованиеһендә был «эшселәр батальондары» киләсәк немец армияһының ядроһын тәшкил итәсәк, тигән тәьҫир ҡалыуы тураһында белдерҙе.

«Шундай уҡ батальондар, — тип дауам итте Штуббе, — Британия зонаһының бөтә өлөштәрендә лә бар».

Унан ары һорау алынған Бранер һәм Шольц Штуббенең күрһәтеүҙәрен тулыһынса раҫлайҙар.

Маньчжурияла халк-азатлык армияһы ғәскәрҙәренең өс ай буйынса һөжүм итеүҙәренең йомғаҡтары

ТӨНЬЯҠ ШЭНЬСИ, 29 март. (ТАСС). Синьхуа агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, төньяҡ-көнсығыш халыҡ-азатлыҡ армияһы штабы, Маньчжурияла ошо йылдың мартына тиклем булған өс ай һөжүм итеү һөҙөмтәһендә Гоминдандың 105 меңдән артыҡ һалдаты һәм офицеры пленға алынды, тип хәбәр иткән. 43.148 гоминдансы үлтерелгән һәм яраланған. Гоминдан ғәскәрҙәренең 5-се яңы армияһы штабы, 8 дивизияһы һәм тулы составлы 6 полкы тар-мар ителгән.

Халыҡ-азатлыҡ армияһы ғәскәрҙәре 6.100 меңдән артыҡ кеше йәшәй торған 190 мең квадрат километр территорияны алғандар.

Гоминдандың 17 генералы пленгә алынған.

Түбәндәге трофейлар алындылар: меңдән артыҡ артиллерия орудиеһы, 9.400-ҙән артыҡ автомат, 57.900 винтовка һәм карабин, 24 миллиондан артыҡ патрон, бик күп снарядтар һәм ҡул гранаталары алынған. Шулай уҡ 3 паровоз, 1 боҙ ватҡыс һәм бер десант судноһы, ике бронепоезд, 2 танк һәм 7 броневик баҫып алынған.

Компартия ойошмаһы бинаһына деголлселәрҙең һөжүм итеүҙәре

ПАРИЖ, 29 март. (ТАСС). «Се Суар» газетаһы, РПФ («Француз халҡының берләшмәһе» — де Голль партияһы, — Ред.) 28 мартта төндә Бобиньиләге (Сена департаменте коммунаһы) коммунистар партияһы ойошмаһының бинаһына һөжүм итте, тип хәбәр итә. Һөжүм итеүселәр бинаның тәҙрәләрен ватҡандар һәм талағандар. Стенаға йәбештерелгән плакаттарҙы йыртып, деголлселәр улар урынына де Голлдең портретын йәбештергәндәр.

Макартур Японияла дөйөм забастовканы тыйҙы

ЛОНДОН, 29 март. (ТАСС). Рейтер агентлығының Токиолағы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, генерал Макартур бөгөн Япония хөкүмәтенә бер ярым миллион связь работниктәренең һәм хөкүмәт учреждениеләре хеҙмәткәрҙәренең 31 мартҡа билдәләнгән дөйөм забастовкаһын тыйыу тураһында бойороҡ биргән.

Бөгөн уҡ Япония хөкүмәте Макартурҙың был бойороғон связь работниктәре союзының иғтибарына еткергән.

Дөйөм забастовка официаль рәүештә тыйылғандан һуң Америка оккупацион властары связь работниктәре союзының Токиолағы бүлеге етәкселәренең береһе коммунист Тосие Ямагуцины ҡулға алғандар.

Румынияла парламентҡа һайлауҙарҙың тәүге йомғаҡтары

БУХАРЕСТ, 29 март. (ТАСС). Юстиция министерствоһы тарафынан бөгөн кискә 7 сәғәт 30 минутта алынған тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Румынияның Бөйөк Халыҡ Собраниеһына һайлауҙарҙа һайлау исемлегенә индерелгән бөтә һайлаусыларҙың 91 проценте ҡатнашлыҡ иткән. Халыҡ демократия фронты өсөн һайлауҙарҙа ҡатнашҡан һайлаусыларҙың 90,8 проценте тауыш биргән.

* * *

БУХАРЕСТ, 30 март. (ТАСС). Юстиция министерствоһы тарафынан алынған тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Бөйөк Халыҡ Собраниеһына һайлауҙарҙа һайлаусылар исемлегенә яҙылған 8.417.465 кешенән 7.663.375 кеше, йәғни һайлаусыларҙың 91,4 проценте тауыш биргән. Тауыш биреүсе бөтә кешеләрҙең 90,8 проценте халыҡ демократияһы фронты исемлеге өсөн, 3,21 проценте — «бойондороҡһоҙ» кандидаттар исемлеге өсөн, 2,79 проценте Гежандың милли-либераль партияһы исемлеге өсөн, 0,66 проценте — Лупу партияһы өсөн үҙҙәренең тауыштарын биргәндәр. Бюллетендәрҙең бер өлөшө дөрөҫ түгел, тип танылған.

Италия полицияһы фашистәрҙе яҡлай

РИМ, 30 март. (ТАСС). Һайлау алды кампанияһы ваҡытында үҙҙәренең көстәрен мобилизациялаусы фашистик элементтар халыҡҡа ҡарата провокация үткәреүҙе дауам итәләр. Уларҙы полиция тулыһынса яҡлай.

Гастелла, Удин ҡалаһының «милли социаль хәрәкәт» тигән фашистик ойошмаһы ораторы [illegible] ваҡытта ыҙғыш сыҡты, тип хәбәр итә. Полиция фашистик ораторҙы [illegible] Муссолиниҙы яҡларға гарантия бирә. [illegible] Һөҙөмтәлә 7 кеше яраланған.

Барлетта [illegible] фашистар демонстрация ойоштороуҙарына полиция [illegible]

[illegible]

Перуджа һәм Болонья районларында полиция отрядтары [illegible]

Тризония төҙөү тураһындағы мәсьәләгә ҡарата

БЕРЛИН, 30 март. (ТАСС). АДН агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Америка хәрби губернаторы Клей [illegible] 27 мартта «бер нисә көн ваҡыттан һуң» Франция хөкүмәте Германиялағы Франция оккупация зонаһын Бизонияға ҡушыу тураһындағы ҡарар ҡабул итер, тип уйлайҙар, тип белдергән. Өс көнбайыш оккупация державаһы вәкилдәре хәҙерге ваҡытта Бизонияға ҡушылыуҙың деталдәрен эшләү менән шөғөлләнәләр.

Ике державаның контроль вәкилдәре [illegible] белдереүенә ярашлы рәүештә, Бизонияла һәм Франция зонаһында берҙәм почта системаһы ойоштоторола.

Сенатор Тэйлорҙың белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 30 март. (ТАСС). Юнайтед Пресс агентлығының Сан-Францисконан хәбәр итеүенә ҡарағанда, [illegible] партияһынан Ҡушма Штаттарҙың вице-президенте вазифаһына кандидат сенатор Тэйлор белдереү яһаған. Был белдереүҙә ул Американың нефть интересттары Иран, Греция, Төркиә һәм Италия эштәренә АҠШ-тың тығылыуы һәм Палестинаға ҡарата үҙенең политикаһын үҙгәртеүҙә [illegible] Ҡушма Штаттары [illegible]. Тэйлор шулай уҡ, Грецияға ҡарата Ҡушма Штаттар тарафынан үткәрелә торған политика, Берләшкән милләттәр ойошмаһының эшен өҙә, тип билдәләгән.

Трумэн вәкиленең Португалияға, Испанияға һәм Италияға барыуы

НЬЮ-ЙОРК, 30 март. (ТАСС). Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Трумэндың Ватиканда вәкиле Майрон-Тэйлор Нью-Йорктан Италияға осоп киткән. Ул, президент тарафынан уға йөкмәтелгән миссия менән Ватиканға барыуы һәм 18 апрелдәге Италиялағы һайлауҙар [illegible] тиклем Италияға килеп етергә теләйем икәнлеген белдергән. Тэйлор шунан Лиссабонға һәм Мадридҡа барасаҡ.

«Нью-Йорк таймс» газетаһының Мадридтағы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, Тэйлор Лиссабонда Салазар менән кәңәшмә уҙғарасаҡ, ә Мадридта Франко менән осрашасаҡ.

АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы Франко Испанияһын „Маршалл планына" индереүҙе хупланы

ВАШИНГТОН, 30 март. (ТАСС). АҠШ-тың вәкилдәр палатаһы 52-гә ҡаршы 149 тауыш менән Франко Испанияһын «Маршалл планына» индереүгә ҡарар итте. [illegible] фашистарына һәм башҡа илдәрҙәге фашистик хәрәкәттәргә ярҙам күрһәтеүе менән билдәле булған республикан партия члены Оконский Франко Испанияһын «Маршалл планына» индереү тураһында закон проектына төҙәтеү индерҙе.

Шахмат буйынса бөтә донъяла беренселек өсөн матч-турнирҙа ҡатнашыусыларҙың Мәскәүгә китеүе

ГААГА, 30 март. (ТАСС). Шахмат буйынса бөтә донъя чемпионы исеме алыу өсөн матч-турнирҙа ҡатнашыусылар бөгөн Голландиянан Мәскәүгә киттеләр. Иртәгә шахматистар Берлинға барып етәсәк һәм унда совет гроссмейстерҙәре сеанс бирәсәктәр.

Делиҙә демократик ойошмалар биналарында тентеүҙәр үткәрелә

ПАРИЖ, 30 март. (ТАСС). Франс Пресс агентлығының Делиҙән хәбәр итеүенә ҡарағанда, кисә иртән коммунистар партияһының һәм башҡа профсоюз ойошмаларының биналарында тентеүҙәр үткәрелгән. Агентлыҡ, полиция был тентеүҙәрҙе, имеш, забастовка [illegible], тип аңлата.

Ҡоралланған көстәр эштәре буйынса сенат комиссияһының ултырышында АҠШ-тың хәрби бюджетын 25 миллиард долларға арттырыу проекты

ВАШИНГТОН, 31 март. (ТАСС). Ҡоралланған көстәр эштәре буйынса [illegible] хәрби программаны тикшереүсе сенат комиссияһында хәрби бюджетте йылына 25 миллиард долларға етереү мөмкинлеге тураһында фекер алышыуҙар булды.

Комиссия члены Морзе (республикан партия), хәҙерге бюджет хәрби расходтарға 11 миллиард доллар тип әйтерлек сумманы һәм бынан тыш — һуңғы һуғыш һөҙөмтәһендә килеп тыуған расходтарҙы ҡаплауға 6 миллиард долларҙан артыҡ сумманы күҙҙә тота тип башлаған, тип күрһәтте. Ул, милли оборона министре Форрестол тәҡдим иткәнсә, [illegible] 20 миллиард доллар тип әйтерлек сумма тәшкил итәсәк, ә хәрби программаға расходтарҙы артабан арттырыу был сумманы 25 миллиард долларға тип әйтерлек дөйөм күләмдә арттырыуға килтерәсәк, тип белдерҙе.

Башҡаланың парк һәм баҡсалары йәйге сезонға әҙерләнә

Александр Матросов исемендәге культура һәм ял паркында, Луначарский, Якутов һәм Салауат исемендәге баҡсаларҙа йәйге сезонды асыуға ҙур эштәр алып барыла.

Хәҙер парниктарҙа сәскәләр үҫтерелә. Юлдар яңы өсөн ҡом һәм ваҡ таштар килтерелгән. Плакаттар, диаграммалар менән биҙәү өсөн быяуҙар, фанералар һәм башҡа кәрәк нәмәләр әҙерләнгән. Баҡсаларҙа сауҙа ойошмалары тарафынан яңы павильондар һәм киоскылар төҙөлә. Быйыл тәмле һыуҙар, эсемлектәр һәм башҡа ашамлыҡ әйберҙәре һатыласаҡ.

Александр Матросов исемендәге культура һәм ял паркы, Луначарский исемендәге баҡса тимер рәшәткә менән әйләндереп алына. Ҡар иреү менән уҡ ремонт эштәре башланасаҡ.

Яңы өҫтәлмә

Черниковск ҡалаһындағы 9-сы номерле ФЗО мәктәбендә (директоры иптәш Вилданов) ошо көндәрҙә 36 кеше уҡыуҙы тамамлап сыҡты һәм улар машиналар төҙөү заводына эшкә ебәреләләр.

Мәктәпте тамамлап сығыусыларҙан Михаил Марков, Николай Салмин, Николай Шумаков иптәштәр бишенсе разряд, ҡалған иптәштәр дүртенсе разряд алып сыҡтылар. Улар заводта слесарь булып эшләйәсәктәр.

Мәктәптә тағы ла күп һанда йәштәр уҡыйҙар. Уларҙың уҡыуы, производство практикаһы яҡшы ойошторолған. Профессиялар буйынса яҡшы йыһазландырылған кабинеттар бар. Йәштәрҙең политик һәм техник белемен күтәреү маҡсатында лекциялар үткәрелә. Ошо көндәрҙә уҡыусылар: «Халыҡ-ара хәл», «Яңы бишйыллыҡта техника», тигән темаларҙа лекция тыңланылар.

Апрель айында мәктәптең бер группаһында яңы выпуск була. Унда шлифовщик, слесарь, тимерсе, газосварщик һәм башҡа һөнәрҙәр буйынса бөтәһе 117 уҡыусы сығарыласаҡ.

Р. Шамбазова.

РАЙОНДА ШАХМАТ ТУРНИРЕ

СТӘРЛЕБАШ. Райондың физкультура һәм спорт советы шахмат турнире үткәрә. Беренсе кругта район үҙәгенең 12 иң яҡшы шахматисе ҡатнашты. Беренсе кругтан һуң алдынғылыҡты йәш шахматист иптәш Хәсәнов алды. Ул мөмкин булған 6 очконан 5-ен йыйҙы. Зинченко, Ғүмәров һәм Мостафин иптәштәр икенсе-өсөнсө урында баралар.

Турнир дауам итә.

ТӨҘӘТЕҮ

28 мартта сыҡҡан газетабыҙҙың өсөнсө битендә «Башҡорт телендә кинофильмдар» тигән мәҡәләнең беренсе бағанаһында йәйә эсендә яҙылған һүҙҙәрҙе «Салауат Юлаев» картинаһының уңышлы тәржемәһен иҫкә алмағанда» тип уҡырға кәрәк.

Редакция.

Яуаплы редактор Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драм театрында — «ТАЛАНТТАР ҺӘМ БАШ ЭЙЕҮСЕЛӘР». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Башгосфилармонияла — Эстрада артистарының беренсе Бөтә Союз конкурсы лауреаттары Валентина Сергеева, Александр Таскин ҡатнашлығында эстрада таҫпалары кисәһе. Киске 9 сәғәттә башлана.

«Октябрҙа» — «ДИҢГЕҘҘӘГЕЛӘР ӨСӨН».

«Салауатта» — «ЗӘҢГӘР ЮЛДАР».

Матросов исемендәге кинола — «КОНЕК-ГОРБУНОК».

ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан рус, башҡорт, татар телдәрендә айына ике тапҡыр сығарыла торған

«АГИТАТОР БЛОКНОТЫ»на

һәм айына бер тапҡыр сығарыла торған «**Пропагандиска һәм агитаторға ярҙамға**» йыйынтығына 1948 йыл өсөн подписка дауам итә.

Подписка хаҡы

блокнотҡа:	йыйынтыҡҡа:
8 айға 5 һум 60 тин,	9 һум 60 тин.
6 айға 4 һум 20 тин,	7 һум 20 тин.
3 айға 2 һум 10 тин.	3 һум 60 тин.
Айырым номере — 35 тин,	1 һум 20 тин.

Подпискалар «Союзпечаттең» бөтә ҡала һәм район бүлектәрендә һәм уларҙың урындағы агенттәре тарафынан ҡабул ителә.

Өфө ҡалаһының Чернышевский урамында, 45-се номерлы йортта тороусы Насыров Хәсән Зариф улы, Өфө ҡалаһының Нариманов урамында, 7-се номерлы йорттоң 1-се квартираһында тороусы Насырова Рәхилә Әхмәт ҡыҙы менән айырылышыу тураһында эш ҡуҙғата. Эш Өфө ҡалаһы, Ленин районының 2-се участка халыҡсудында ҡараласаҡ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26

П 00107. Өфө газета-журналдар типографияһы. Тираж 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
№ 67
1949 йыл
3 апрель
шәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Министрҙәр Советендә. 1947 йылда әҙәбиәт һәм кинематография өлкәһендә күренекле хеҙмәттәр өсөн Сталин премияларын биреү тураһында. (1-се бит).
В. М. Молотовтың Бельгия посолы Гоффэн әфәндене ҡабул итеүе. (1-се бит).
КОМСОМОЛ ТОРМОШО. А. Шишкин. — Комсомолецтәр баҫыу эштәренә әҙерлектә актив ҡатнашалар, Х. Ғәлимов. — Юғары урожай өсөн көрәш ойоштороусылар. (2-се бит).
ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘӘ МАЙ АЛДЫ ЯРЫШЫ. Ярыштың һөҙөмтәле булыуына, йөкләмәләрҙең көн һайын үтәлеүенә өлгәшергә! (2-се бит).
М. Маринин. «Маршалл планы» һәм «Көнбайыш Союз». (2—3-сө биттәр).
СӘСЕҮ АЛДЫ ӘҘЕРЛЕК ЭШТӘРЕН ТИҘЕРӘК ТАМАМЛАРҒА! Ғ. Ғәзизуллина. — Ҡандра районында яҙҙың килеп етеүен һиҙмәйҙәр. Ғ. Ҡотлобаев. — Яғыулыҡты сәсеү ваҡытында ташырға уйлайҙар, Б. Сөләймәнов. — Киндерҙән юғары урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ. (3-сө бит).
Редакцияға хаттар. (3-сө бит).
А. Веретенников, С. Еникеев. — Урындағы ашламаларҙы киң ҡулланырға. (4-се бит).
Беҙҙең республикала. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Колхоздың яҙғы сәсеүгә эш планы

Үткән йылдағы кеүек үк, быйыл да Алтай крайы игенселәре өлгөһендә бөтә Тыуған илебеҙҙә ауыл хужалығын тағы ла ҡеүәтлерәк күтәреү өсөн социалистик ярыш киң йәйелде. Юғары урожай өсөн көрәш үҙенең яуаплы этабына килеп етте — бик тиҙҙән беҙҙең республикабыҙ колхоздарында ла яҙғы баҫыу эштәре башланасаҡ.

Быйыл республикабыҙ крәҫтиәндәре алдында сәсеү майҙандарын киңәйтеү һәм урожайлылыҡты күтәреү буйынса бик яуаплы бурыстар тора. Тик көсөркәнешле эшләгәндә, бөтә мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланғанда ғына уларҙы уңышлы хәл итеп буласаҡ. Ауыл хужалығы работниктәре быны яҡшы аңлайҙар һәм баҫыу эштәрен өлгөлө әҙерлек менән ҡаршылау өсөн бөтә хәстәрлектәрҙе күрәләр.

Сәсеүгә әҙерләнеү осоронда үткәрелә торған саралар эсендә колхоздарҙа производство һәм эш пландарын төҙөү бик ҙур әһәмиәткә эйә. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ колхоз производствоһын планлаштырыуға һәр ваҡыт ныҡлы иғтибар бирҙеләр һәм бирәләр. СССР Министрҙәр Советы быйыл колхоздар өсөн производство пландарының яңы формаһын раҫланы. Был планда общественный хужалыҡты бөтә тармаҡтар буйынса үҫтереү күҙ уңында тотола. Бригадаларҙы һәм звеноларҙы нығытыу, тапшырылған эш өсөн уларҙың яуаплылыҡтарын арттырыу көндөң мөһим бурысы. Хәҙер бригадаларға һәм звеноларға йыллыҡ производство заданиеләре бирелә. Шуның нигеҙендә колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙың төп формаһы булған производство бригадалары һәм улар эсендәге даими звенолар бөтә хужалыҡ йылы буйынса тырышып эшләргә, заданиеләрҙең теүәл үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр.

Яҙғы сәсеүҙең эш планы—юғары урожай өсөн көрәштә мөһим ҡорал. Унда яҙғы сәсеү осоронда башҡарыла торған бөтә эштәр күрһәтелергә, уларҙы ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары сифатлы итеп үтәү өсөн бөтә саралар билдәләнергә тейеш. Алдынғы колхоздар эш планы төҙөүҙе тамамланылар. Ләкин күпселек колхоздарҙа был өлкәлә эш әле бик аҡрын бара. Стәрлетамаҡ районында әле булһа бер генә колхоз да яҙғы сәсеүгә эш планы төҙөмәгән. Хатта күпселек колхоздарҙа производство пландарын төҙөү ҙә тамамланмаған. Шулай уҡ Зианчура, Кушнаренко, Шишмә райондары колхоздарында ла был мөһим мәсьәләгә тейешле иғтибар бирелмәй. Яҙғы баҫыу эштәре башланырға һанаулы ғына көндәр ҡалыуға ҡарамаҫтан, бригадалар, звенолар конкрет заданиеләр алмағандар, колхозсылар ниндәй эш башҡарасаҡтарын, эшләп сығарыу нормаларын, расценкаларҙы белмәйҙәр.

Бозаяз районының күп кенә колхоздарында яҙғы сәсеүгә эш планы төҙөүгә серьез иғтибар бирелмәй. Производство пландарында ҡаралған эшләп сығарыу нормалары яҙғы сәсеү осоро өсөн эш планында кәметелеп ҡуйыла. Ворошилов исемендәге колхозда производство планында сәскес менән көнөнә 4 гектар майҙанда сәсеү үткәреү нормаһы билдәләнгән булһа, эш планында ул 3 гектарға ғына ҡалдырылған. Бындай практика башҡа колхоздарҙа ла бар. Мәҫәлән, Тельман исемендәге колхозда ат һабаны менән көнөнә ни бары 0,40 гектар ғына ер һөрөү нормаһы билдәләнә. Был — зарарлы тенденция, ул баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта үткәреү, юғары урожай өсөн көсөркәнешле рәүештә көрәшеүҙе күҙ алдында тотмай, ә киреһенсә, сәсеүҙе һуҙыуға, урожайҙы кәметеүгә юнәлтелгән норма. Шул уҡ колхозда производство планында ҡаралған 1,5 гектарҙа ағас ултыртыу эш планына бөтөнләй индерелмәгән.

Яҙғы сәсеүгә эш планын төҙөүҙә бындай етешһеҙлектәр — улар колхоз производствоһын планлаштырыуға тейешле иғтибар бирмәүҙең һөҙөмтәләре. Күп кенә колхоз етәкселәре, ауыл хужалығы специалистәре, партия, совет ойошмалары колхоз кеүек күп тармаҡлы эре общественный хужалыҡтарҙы ентекле рәүештә төҙөлгән пландан һәм ул пландарҙы тормошҡа ашырыу өсөн ныҡышмалы көрәштән башҡа уңышлы рәүештә алға ебәрергә мөмкин түгеллеген аңламайҙар. План төҙөү, үкенескә ҡаршы, күп ваҡиғаларҙа әҙер графаларға цифрҙар яҙып сығыу тип кенә ҡарала. Пландың ойоштороусанлыҡ роле баһаланмай, ул тормошҡа ашырылырға тейешле программа итеп ҡаралмай. Бындай етешһеҙлектәргә бер генә урында ла артабан юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Эш планы яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙе тәьмин итерлек итеп төҙөлергә тейеш. Төп маҡсат — государство тарафынан билдәләнгән сәсеү планын ҡыҫҡа сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үтәү. Был ғәйәт яуаплы бурыс. Уны хәл итеү өсөн бөтә колхозсылар сәсеү осоронда эштә актив ҡатнашырға тейештәр. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү—сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн мөһим шарт. Шулай булғас, эш нормаларына айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Уларҙы билдәләгән саҡта алдынғыларҙың өлгәшеүҙәренә, тәжрибәләренә ориентировка яһалырға тейеш. Урта күрһәткестәргә тигеҙләнеү — ул хужалыҡты артҡа һөйрәү, алға ынтылышҡа ҡамасаулау тигән һүҙ.

Яҙғы сәсеү осоронда йәнле тартыу көстәренә лә ҙур нагрузка төшә. Күп кенә колхоздарҙа аттар менән генә уны үтәп булмаясаҡ. Тимәк, үгеҙҙәрҙе егергә өйрәтеү, еңелерәк эштәрҙә һыйырҙарҙы файҙаланыу ҙа талап ителәсәк. Был саралар бөтәһе лә эш планында ҡарала. Шуның менән бергә, һәр кем үҙенең ҡайҙа эшләйәсәген, эш нормаһының күпме билдәләнеүен һәм расценкаһын ныҡлы белергә һәм уны үтәү һәм арттырып үтәү өсөн бөтә энергияһын биреп эшләргә тейеш.

Сәсеү алды көндәрендә республикабыҙ игенселәре бөтә әҙерлек эштәрен өлгөлө тамамлау өсөн ҙур хәстәрлектәр күрәләр. Колхоздарҙа яҙғы сәсеүгә эш пландарын төҙөүҙе тиҙләтеү, уны үтәү өсөн көстө туплау мәсьәләһенә лә ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк. Иң беренсе нәүбәттә был эштә колхоз етәкселәренә ауыл хужалығы бүлектәре, уның агрономдары ярҙам итергә тейештәр. Колхоз производствоһын яҡшы планлаштырыу шулай уҡ урындағы партия, совет ойошмаларының да мөһим бурысы. Яҙғы сәсеүҙе ойоштороу яғынан тәьмин итеү—уның уңышлы үткәрелеүен хәл итәсәк.

СССР Министрҙәр Советендә

1947 йылда әҙәбиәт һәм кинематография өлкәһендә күренекле хеҙмәттәр өсөн Сталин премияларын биреү тураһында

ССР Союзы Министрҙәр Советы 1947 йылда түбәндәге өлкәләрҙәге күренекле хеҙмәттәре өсөн Сталин премияларын бирергә ҡарар итте:

А. Художестволы проза өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Михаил Семенович **Бубенновҡа** — «Аҡ ҡайын» романы өсөн.
2. Петр Андреевич **Павленкоға** — «Бәхет» романы өсөн.
3. Илья Григорьевич **Эренбургҡа** — «Дауыл» романы өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Александр Терентьевич **Гончарға** — «Знаменосецтәр» романы өсөн.
2. Эммануил Генрихович **Казакевичкә** — «Йондоҙ» повесе өсөн.
3. Берды Мурадович **Кербабаевҡа** — Төрөкмәнстан ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеленә — «Хәл иткес аҙым» романы өсөн.
4. Валентин Иванович **Костылевҡа** — «Иван Грозный» трилогияһы өсөн.
5. Вера Федоровна **Пановаға** — «Кружилиха» романы өсөн.
6. Федор Иванович **Панферовҡа** — «Тыныслыҡ өсөн көрәш» романы өсөн.

25.000 һум күләмдә ӨСӨНСӨ дәрәжәләге премиялар

1. Виктор Федорович **Абдеевҡа** — «Кәтеүҙәр юлдарҙа» повесе өсөн.
2. Борис Абрамович **Галинға** (Рогалинға) — «Донбасста», «Бер ауылда» очерктәре өсөн.
3. Тамбор Магометович **Керашевҡа** — «Бәхет юлы» романы өсөн.
4. Вера Казимировна **Кетлинскаяға** — «Ҡамалған урында» романы өсөн.
5. Иван Андреевич **Козловҡа** — «Ҡырым подпольеһында» китабы өсөн.
6. Иосиф Исаакович **Ликстановҡа** — «Кескәй бала» повесе өсөн.
7. Николай Николаевич **Михайловҡа** — «Тыуған ил картаһы янында» китабы өсөн.

Б. Поэзия өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Николай Матвеевич **Грибачевҡа** — «Большевик» колхозы» поэмаһы өсөн.
2. Алексей Иванович **Недогоновҡа** — «Ауыл Советы өҫтөндәге флаг» поэмаһы өсөн.
3. Владимир Николаевич **Сосюраға** — «Шаулаһын баҡсалар» тигән шиғырҙар йыйынтығы өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Ян **Судрабкалнға** (Арвид Карлович Пейнегә), Латвия ССР-ы халҡ шағиренә—«Туғандаш семьяла» тигән шиғырҙар йыйынтығы өсөн.
2. Максим **Танкка** (Евгений Иванович Скурко) — «Әгәр күрһәләр ике» тигән шиғырҙар йыйынтығы өсөн.
3. **Турсун—Зада Мирзоға**—«Индия балладаһы», «Ганг», «Томанлы көнбайыштан килеләр кешеләр», «Тарачандри», «Бомбейҙәге әленеп торған баҡса», «Кеше иҫкә алыны» тигән шиғырҙар өсөн.

В. Драматургия өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Борис Сергеевич **Ромашовҡа** — «Бөйөк көс» пьесаһы өсөн.
2. Август Михаелевич **Якобсонға** — «Фронт һыҙығынан ситтәге көрәш» пьесаһы өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Николай Евгеньевич **Виртаға** — «Иген беҙҙең иң кәҙерле» пьесаһы өсөн.
2. Анатолий Владимирович **Софроновҡа** — «Бер ҡалала» пьесаһы өсөн.

Г. Әҙәби тәнҡит һәм искусство эштәре өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

1. Борис Владимирович **Асафьевҡа**, академик, СССР халҡ артисенә — «Глинка» китабы өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Борис Соломонович **Мейлахҡа**, филология фәндәре докторы, профессорға — «Ленин һәм XIX быуаттың аҙағында һәм XX быуаттың башында рус әҙәбиәте проблемалары» китабы өсөн.
2. Милица Васильевна **Нечкинаға**, тарих фәндәре докторы, профессорға — «Грибоедов һәм декабристәр» китабы өсөн.

Д. Художестволы кинематография өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Иван Александрович **Пырьевҡа**, сценарий авторҙары Евгений Михайлович **Помещиковҡа**, Николай Васильевич **Рожковҡа**, оператор Валентин Ефимович **Павловҡа**, композитор Николай Николаевич **Крюковҡа**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Марина Алексеевна **Ладынинаға**, артист Владимир Васильевич **Дружниковҡа**, артист Борис Федорович **Андреевҡа**, артистка Вера Кузьминична **Васильеваға** — «Себер ере тураһында хикәйәт» тигән төҫлө кинокартина өсөн.
2. Төрөкмән ССР-ы атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Марк Семенович **Донскойға** сценарий авторы Мария Николаевна **Смирноваға**, РСФСР-ҙың халҡ артисткаһы Вера Петровна **Марецкаяға**, оператор Сергей Павлович **Урусевскийға**, «Ауыл уҡытыусыһы» кинокартинаһы өсөн.
3. РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Михаил Ильич **Роммға**, оператор Борис Израилович **Волчекҡа**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Всеволод Николаевич **Аксеновҡа**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Елена Александровна **Кузьминаға**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Борис Михайлович **Тенинға**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Михаил Федорович **Астанговҡа** (Ружниковҡа), артист Михаил Михайлович **Названовҡа**, художник Семен Соломонович **Манделгә** — «Рус мәсьәләһе» кинокартинаһы өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Эстон ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Герберт Морицович **Раппопортҡа**, Эстон ССР-ы халҡ артисе Хуго Тынович **Лаурға**, артистка Лия Карловна **Лаатсҡа**, артист Лембит Якобович **Раялаға** — «Цитаделдәге тормош» кинокартинаһы өсөн.
2. Режиссер Григорий Михайлович **Козинцевкә**, сценарий авторы Юрий Павлович **Германға**, РСФСР халҡ артисе Константин Васильевич **Скоробогатовҡа**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле, оператор Андрей Николаевич **Москвинға**, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле, художник Евгений Евгеньевич **Енейға** — «Пирогов» кинокартинаһы өсөн.
3. Үзбәк ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Камиль **Ярматовҡа**, Үзбәк ССР-ының атҡаҙанған артисе Асат **Исматовҡа**, Үзбәк ССР-ының атҡаҙанған артисе Разак **Хамраевҡа** — «Алишер Навои» кинокартинаһы өсөн.
4. РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе, режиссер Борис Васильевич **Барнетҡә**, артист Павел Петрович **Ҡадочниковҡа**, художник Мориц Борисович **Уманскийға**, сценарий авторҙары Михаил Юрьевич **Блейманға**, Константин Федорович **Исаевҡа**, Исидор Борисович **Маклярскийға** — «Разведчик подвиге» кинокартинаһы өсөн.

Е. Хроникалы документаль кинематография өлкәһендә

100.000 һум күләмдә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Режиссер Илья Петрович **Копалинға**, режиссер Ирина Фроловна **Сеткина-Нестероваға**, Латыш ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле, сценарий авторы Борис Николаевич **Агаповҡа**, оператор Владимир Анисимович **Фроленкоға**, оператор Рувим Борисович **Халушаковҡа**, «Мосфильм» киностудияһының төҫ лабораторияһы етәксеһе Евсей Абрамович **Иофискә** — «Еңгән [illegible]» тигән төҫлө кино картина өсөн.
2. Режиссер Михаил Яковлевич **Слуцкийға**, режиссер Георгий Николаевич **Тасинға**, оператор Абрам Григорьевич **Кричевскийға**, оператор Константин Иванович **Богданға** — «Совет Украинаһы» тигән төҫлө кинокартина өсөн.

50.000 һум күләмдә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. Режиссер Лидия Ильинична **Степановаға**, режиссер Федор Иванович **Киселевҡа**, сценарий авторы Илья Израилович **Бачелискә**, оператор Виктор Васильевич **Доброницкийға**, оператор Сергей Андреевич **Семеновҡа** — «Мәскәү — СССР-ҙың башҡалаһы» тигән кинокартина өсөн.
2. Латыш ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле, режиссер Леонид Михайлович **Кристиға**, Латыш ССР-ының атҡаҙанған искусство деятеле режиссер Сергей Николаевич **Гуровҡа**, оператор Борис Александрович **Соколовҡа**, оператор Алексей Георгиевич **Семинға** — «Совет Латвияһы» кинокартинаһы өсөн.
3. Режиссер Владимир Николаевич **Байковҡа**, оператор Борис Константинович **Макасеевҡә**, оператор Михаил Федорович **Ошурковҡа**, оператор Александр Гаврилович **Шекутьевҡә**, оператор Николай Александрович **Вихиревҡә**—«СССР-ҙың һауа флоты көнө» тигән төҫлө кинокартина өсөн.
4. Режиссер Ирина Владимировна **Венжерға**, режиссер Самуил Довидович **Бубрикҡә**, оператор Иван Иванович **Беляковҡа** оператор Марк Антонович **Трояновскийға** — «1947 йылда физкультурниктәрҙең бөтә Союз парады» тигән төҫлө кинокартина өсөн.

В. М. Молотовтың Бельгия посолы Гоффэн әфәндене ҡабул итеүе

1 апрелдә СССР Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов Бельгияның СССР-ҙағы Тулы Хоҡуҡлы һәм Ғәҙәттән Тыш Посолы Л. Гоффэн әфәндене ҡабул итте. Л. Гоффэн әфәнде СССР Верховный Советы Президиумы Председателенә үҙенең ышаныс грамоталарын тапшырырға тейеш булыуы айҡанлы ҡабул ителде.

(ТАСС).

Тракторҙар өсөн запас частәр

Директоры иптәш Советов булған завод работниктәре ҡиммәтле инициатива күрһәттеләр. Улар, төп программаға зарар килтермәйенсә, үҙҙәренең резервтәрен файҙаланып, тракторҙар өсөн һәр төрлө запас частәр әҙерләүҙе ойоштороҙолар. Хәҙер 79 мең һумлыҡ запас часть эшләп сығарылды ла инде. Был, квартал заданиеһенең 103,6 процентын тәшкил итә.

Начальниктары Пузаков һәм Стрелкова иптәштәр булған цехтар алда баралар. Был цехтар трактор деталдәре әҙерләү нормаларын һәр көндә арттырып үтәйҙәр. Автоматчик Птичкин, мастер Гулдоров, Кривоносова, Дубровина һәм Нурдинова иптәштәр айырыуса юғары эш өлгәләре биреүгә өлгәштеләр. Уларҙың көндәлек эшләп сығарыу нормалары 150-шәр процентҡа етә.

Физика һәм астрономиялағы яңылыҡтар

Физика-математика фәндәре бүлеге сессияһында

Мәскәүҙә СССР фәндәр Академияһының физика-математика бүлеге сессияһы үткәрелде. Ултырышта академик С. И. Вавилов, А. Ф. Иоффе һәм башҡа күренекле ғалимдәр ҡатнаштылар.

Физика-математика фәндәре докторы В. И. Левшиндең фосфорҙың айырым төр яҡтыртылыуы механизмы тураһындағы докладын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылды. Доклад яһаусы, төҙөк люминесценция теорияһын барлыҡҡа килтереү совет физика фәненең айырыуса хеҙмәте булып торғанлыҡты билдәләп үтте.

Академик С. И. Вавилов сығыш яһап, халҡ хужалығында файҙаланыу һаман киңәйә барған люминесценция күренештәренә тикшеренеү эштәрен алып барыуҙың ҙур практик әһәмиәтен әйтеп үтте.

СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденте А. Я. Орлов полюстәрҙең урындарын билдәләүҙә совет астрономияһының, Америка астрономик методтарына ҡарағанда, уңайлы яҡтары тураһында һөйләне.

Сессияла шулай уҡ физика-математика фәндәре докторы Л. В. Канторовичтең — «Функциональ анализ һәм прикладная математика» тигән темаға докладын тыңланды.

(ТАСС).

Массовый рәүештә мамыҡ сәсеү башланды

Үзбәк ССР-ы Сурхан-Дарья һәм Фергана өлкәләрендәге, Төркмән ССР-ы Чарджау өлкәһендәге һәм Таджик ССР-ы Вахш үҙәне буйындағы колхоздарҙа массовый рәүештә мамыҡ сәсеү башланды. Был өлкәләрҙең шулай уҡ башҡа райондарында ла сәсеү башланды. Азербайжан колхоздары мамыҡ сәсеүҙе башланылар. Илден колхоздары 25 мартҡа барлығы 70 мең гектарҙан артыҡ мамыҡ сәстеләр.

(ТАСС).

Донда массовый сәсеү

ДОНДАҒЫ РОСТОВ. (ТАСС). Өлкәнең төн яғында һәм көньяғында яҙғы сәсеү эштәре киңәйә бара. Ун райондағы колхоздар ужым ашлыҡтарын тырматыу, сәсеү алдынан культивация үткәреү һәм һөрөү эштәрен башҡаралар. Өлкәнең көнбайышында, Песчанокопск, Развиленск һәм башҡа райондарында яҙғы ашлыҡтарҙы сәсеү башланды. Сальск игенселәре тупраҡта дымды күберәк һаҡлап ҡалдырыуға ҙур әһәмиәт бирәләр. Улар Донда беренсе булып 70 мең гектар майҙанды тырматыу эшен тамамланылар. 11 мең гектар майҙанда сәсеү алды культивацияһы уҙғарылды. Сальск районы баҫыуҙарында 200 трактор, йөҙләгән ат һәм үгеҙ эшләй. Беренсе көндәр колхозсыларҙың юғары хеҙмәт өлгәләрен күрһәттеләр. Күп трактористәр нормаларын байтаҡ арттырып үтәйҙәр һәм яғыулыҡҡа экономия яһайҙар.

Сальск районы колхоздары 5 мең гектар майҙанда яҙғы бойҙай сәстеләр. Н. Маховтың трактор бригадаһы тракторҙарын төндә һөрөү, сәсеү алды культивациялары үткәреүҙә, ә көндеҙ сәсеү эшендә файҙаланып, ҡиммәтле инициатива күрһәтте. «Гигант» һәм «Азовск» совхоздарында ла баҫыу эштәре башланды.

Ала-тау итәгендә гидроэлектр станция

Ҡазағстан башҡалаһынан алыҫ булмаған урында Ҙур Алма-Ата йылғаһында 12 гидроэлектр станция ҡоролаҫаҡ. 29 мартта Ала-Тау итәгендә етенсе электр станция эксплоатацияға тапшырылды ла инде. Яңы электр станция биргән энергия Ҡазағстанда 1920 йылдағы бөтә электр станциялар биргән энергияға тиңеҙ.

Ҙур Алма-Ата күленән, диңгеҙ кимәленән ике километр бейеклектә, беренсе номерлы ҡеүәтле гидроэлектр станция төҙөүгә әҙерлек эштәре башланды.

Комсомол тормошо

Комсомолецтәр баҫыу эштәренә әҙерлектә актив ҡатнашалар

Ауыл хужалығын күтәреү өсөн көрәштә комсомолецтар өҫтөнә ҙур һәм яуаплы бурыстар йөкмәтелә. Был бурыстарҙы үтәүҙә беҙҙең ВЛКСМ райкомы колхоз комсомол ойошмаларына практик ярҙам күрһәтә. Комсомол ойошмаларының колхоз правлениеларына булышыуҙары тураһында комсомол ойошмалары секретарҙарының отчеттары райком бюроһында тыңланып, уларҙың эштәрен яҡшыртыу өсөн конкрет күрһәтмәләр бирелә. Был эш ыңғай һөҙөмтәләр бирә.

«МОПР» колхозы комсомол ойошмаһы яҙғы сәсеүгә әҙерлек эшендә колхоз правлениеһына ярҙам итмәй, был эштән ситтә тора ине. Ойошма секретаре иптәш Сәлимьяновтың отчетын бюрола тыңланыҡ. Бюрола тикшереү һөҙөмтәһендә был комсомол ойошмаһының ауыл хужалығын күтәреү өсөн көрәштән ситтә торғанлығы раҫланды. Бюро иптәш Сәлимьяновҡа эштәге етешһеҙлектәрен күрһәтте һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн практик юлдар билдәләне.

Комсомол ойошмаһы райком бюроһында күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет эшкә тотондо. Комсомолецтарҙан күбеһе колхоздың яҙғы сәсеүгә әҙерлектәге мөһим эш участкаларына урынлаштырылды.

Комсомол ойошмаһы һәр бер комсомолецтан үҙ өҫтөнә йөкмәтелгән эште теүәл ерекә еткереүен талап итте. Комсомолец Ахмеров ауыл хужалығы машиналарын һәм инвентарҙарын ремонтлау эшен яҡшы сифатлы итеп, билдәләнгән ваҡытта тамамлауҙы ойошторҙо. Һәр кем үҙ өҫтөнә алынған йөкләмәһен үтәү өсөн көрәште. Шул арҡала колхоздың ауыл хужалығы машиналары һәм инвентарҙары 20 мартҡа тулыһынса ремонтланды.

Комсомолец иптәш Камалов сәсеү орлоҡтарын таҙартыу, уны тейешле кондицияға еткереү эшен ойошторҙо. Комсомолецтар һәм союздан тыш йәштәр эштең был участкаһында ла ҙур дәрт менән эшләнеләр. Хәҙер колхоздың сәсеү майҙанына етерлек орлоҡ таҙартылды һәм тейешле кондицияға еткерелеп, әҙерләп ҡуйылды. Колхоз яҙғы сәсеүгә тулыһынса әҙер.

Ауыл комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәр аттарҙы үҙ шефлыҡтарына алдылар.

«Сигнал», «Пахарь», Чкалов исемендәге колхоздарҙың комсомолецтәре сәсеү орлоҡтарын әҙерләү, ауыл хужалығы машиналарын һәм инвентарҙарын ремонтлау эштәрен тәьмин итеү менән бергә, аттарҙың да яҡшы ҡаралыуҙарына, уларҙы баҫыу эштәренә тикләм көрәйтеүгә өлгәштеләр.

А. Шишкин,
ВЛКСМ-дың Асҡын райкомы секретаре.

Юғары урожай өсөн көрәш ойоштороусылар

Район комсомолецтәре алтайлылар хатына яуап итеп, юғары урожай өсөн көрәшкә ҡушылдылар. Районда быйыл комсомолецтәрҙән һәм союздан тыш йәштәрҙән 47 урында юғары урожай звенолары төҙөлдө. Улар колхоз баҫыуҙарында юғары урожай үҫтереү өсөн агротехник саралар үткәреүҙә колхоз правлениеларына ярҙам итәләр.

«Совет» колхозы быға тиклем районда иң артта ҡалған колхоздарҙан иҫәпләнә ине. Колхоз комсомолецтәре үҙ артелдәрен алдынғылар сафына сығарыуҙы төп бурыс итеп ҡуйҙылар. Был бурысты үтәү баҫыуҙарҙа агротехниканы киң ҡулланыуҙы талап итә. Шуға күрә, комсомол ойошмаһы комсомолецтарҙан һәм союздан тыш йәштәрҙән субботниктәр ойоштороп, ҡар тотоу, баҫыуға тиреҫ сығарыу эштәрен үткәрҙе. Был эштә комсомолка иптәш Ғәбдрафикова етәкселек иткән комсомолец-йәштәр звеноһы айырыуса тырышып эшләне. Был звеноның членында Алтай колхозсыларының иптәш Сталинға яҙған хаты менән танышҡас, үҙ өҫтәренә юғары урожай үҫтереп алыу өсөн конкрет йөкләмәләр алдылар һәм ошо йөкләмәне үтәү өсөн звено үҙенә беркетелгән участкаға етерлек тикләм тиреҫ сығарыу, ҡар тотоу эштәрен үткәрҙе. Хәҙер звено членыдәре ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға әҙерлек саралары күрәләр.

«Память Ленина» колхозы комсомол ойошмаһы ла (секретаре иптәш Павлов) комсомолецтәрҙе һәм союздан тыш йәштәрҙе юғары урожай өсөн көрәшкә тупланы. Бында комсомолецтарҙың күбеһе колхоздың баҫыусылыҡ бригадаларында эшләй. Улар союздан тыш йәштәрҙе һәм бөтә колхозсыларҙы яҙғы сәсеүгә өлгәле әҙерләнеүгә ойошторалар. Комсомолецтарҙың һәм союздан тыш йәштәрҙең көсө менән ауыл хужалығы машиналарына һәм инвентарҙарына ремонт үткәрелде. Һабандар, тырмалар һәм сәскес машиналар бөтәһе лә яҡшы сифатлы итеп ремонтланды. Комсомолецтарҙан ун кеше, союздан тыш йәштәрҙән 35 кеше агротехника түңәрәгендә, комсомолецтарҙан 7 кеше һәм союздан тыш йәштәрҙән 15 кеше зоотехника түңәрәгендә уҡыны.

М. Горький, К. Маркс һәм Ленин исемендәге колхоздарҙың комсомолецтәре лә яҙғы сәсеүгә әҙерләнеүҙә ауыл хужалығы артелдәренең правлениеларына ярҙам күрһәтәләр.

Х. Ғәлимов.
Баҡалы районы, (Үҙ хәбәрсебеҙ).

Йәш нефтселәр слеты

Ошо көндәрҙә ВЛКСМ-дың Октябрьск ҡала комитете йәш нефтселәрҙең слетын үткәрҙе. Бында ҡаланың комсомолецтәренән һәм союздан тыш йәштәрҙән 210 кеше ҡатнашты. Слетта «Туймазынефть» тресының өлкән инженеры иптәш Голонский «Биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүҙә йәш нефтселәрҙең бурыстары» тигән темаға доклад яһаны.

Слетта комсомолка геолог иптәш Рассказова комсомолецтарҙың һәм союздан тыш йәштәрҙең нефть сығарыуҙа һөҙлангыс эш өлгөләре күрһәтеүҙәре тураһында һөйләне.

— Беҙҙең промыселда, — тине ул, — унарлаған алдынғы йәш операторҙар, мастерҙар үҫеп сыҡтылар. Йәштәр үҙҙәренең белемдәрен һәм хеҙмәт квалификацияларын күтәреү өҫтөндә арымай-талмай эшләйҙәр.

Фрезеровщик Смирнов, оператор Положенцев, өлкән инженер Кривошеин иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

С. Ғәлимова.

Контроль постар

Сталинград ҡалаһы «Красный Октябрь» заводы комсомолецтәренең браҡҡа, юғалтыуҙарға, хужаһыҙлыҡҡа ҡаршы көрәш өсөн контроль постар булдырыу тураһындағы инициативаларын Өфө паровоздар ремонтлау заводы комсомолецтәре һәм йәштәре хуплап ҡаршыланылар. Заводта инде 14 контроль пост бар. Эштә булған етешһеҙлектәр һис кисектерелмәҫтән тикшерелә һәм уларҙы бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрелә.

Был метод үҙенең яҡшы һөҙөмтәләрен бирҙе лә инде. Заводта комсомолецтарҙан план үтәмәүсе бер генә кеше лә юҡ. Брак кәмеү арҡаһында ғына февраль айында 25 мең һум экономия яһалды.

Комсомолец В. С. Словохотов ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ике профессия үҙләштерҙе. Ул производство техникаһын даими рәүештә өйрәнә, браҡҡа ҡаршы көрәш инициаторы булып тора. Көндәлек нормаһы 200—250 процентҡа үтәй.

Слесарь-бригадир иптәш Тупиковтың эше ҙур әһәмиәткә эйә. Российский методын ҡулланып, ул оборудованиеларҙы оҫта файҙалана. Ул иҫке резервтарҙы файҙаланыу буйынса йәштәр бригадаһы төҙөнә. Иптәш Тупиков үҙе һәр сменала икешәр норма үтәй.

Ә. Фәтҡуллин.

ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘӘ МАЙ АЛДЫ ЯРЫШЫ

ЯРЫШТЫҢ ҺӨҘӨМТӘЛЕ БУЛЫУЫНА, ЙӨКЛӘМӘЛӘРҘЕҢ КӨН ҺАЙЫН ҮТӘЛЕҮЕНӘ ӨЛГӘШЕРГӘ!

☆ ☆ ☆

Ишембай нефтселәре ярышҡа сығалар

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Өфөләләр миҫалында Ишембай нефтселәре лә май алды ярышына ҡайнар дәрт менән ҡушылалар. Беренсе кварталда производство планын срогынан 10 көн элек үтәп, пландан тыш меңдәрсә тонна ягыулыҡ биргән нефть ҡыуыу заводы (директоры иптәш Варшавер) коллективе ҡалала беренсе булып май алды ярышына ҡушылды. Коллектив үҙенең ярыш йөкләмәһендә апрель айында керосин эшләп сығарыу планын 130 процентҡа үтәү, дүрт ай эсендә пландан тыш ун дарса мең тонна ягыулыҡ биреү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, экономия иҫәбенә бер миллион һум файҙа биреү, индивидуаль торлаҡтар төҙөүҙең ярты йыллыҡ планын беренсе майға үтәү бурысын ҡуя.

Беренсе кварталда нефть сығарыу планын 29 мартҡа үтәгән икенсе промысел коллективе ла байрам хөрмәтенә арналған ярышҡа ҙур дәрт менән ҡушылды. Промысел апрель айында нефть сығарыу планын 102, ер аҫты ремонты планын 120 процентҡа үтәргә, сығарылған нефть һәм газдың үҙенә төшөү хаҡын планға ҡарағанда 5 процентҡа кәметергә, эшләмәй ултырған өс скважинаны яңынан эксплоатацияға бирергә йөкләмә алды. Алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн нефть сығарыуҙы интенсификациялау саралары билдәләнде.

Икенсе промысел коллективе ошо йөкләмәләрҙе алып, ҡаланың бөтә предприятиеләрҙе һәм промыселдарҙе май алды ярышын йәйелдереп ебәрергә саҡырҙы. Уларҙың саҡырыуы башҡа коллективтарҙа ҡайнар отклик таба.

Г. Ибраһимов.

Пландан тыш 51 комбайн моторы

Ике йыл буйына производство планын үтәй алмай килгән Черниковск машиналар төҙөү заводы 1948 йылдың тәүге өс айында эш темпын байтаҡ күтәрҙе. Социалистик ярышты йәйелдереп һәм ойоштороу-техник планда билдәләнгән күп кенә сараларҙы тормошҡа ашырып, завод коллективе квартал планын срогынан ике көн алда үтәне.

Заводтың комбайн моторҙары йыйыу цехы коллективе ярышта айырыуса өлгө күрһәтте. Цехтың комсомолец-йәштәре май алды ярышына сығып, апрель айында пландан тыш 50 комбайн моторы эшләп сығарырға алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр. Пландан тыш 51 комбайн моторы эшләп сығарылды. Вязагин, Черезов, Волков иптәштәр етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадалары бер ярым-ике норма бирҙеләр.

Цех коллективе байрам хөрмәтенә ярышты артабан йәйелдереп, май айында пландан тыш тағы ла 50 комбайн моторы эшләп сығарырға, ҡойоу цехының комсомолец-йәштәре заводтың шефлыҡ иткән машина-трактор станцияларына запас часттар һәм инструменттар етештереп биреү өсөн эш ваҡытынан тыш 450 сәғәт эшләргә булдылар. Башҡа цехтарҙа ла май байрамы хөрмәтенә арналған ярыш киң йәйелдерелә.

Электротехник заводы эшселәре, инженер-техник работниктәре агрегат заводы коллективе саҡырыуын хуплап ҡаршы алдылар. Эшселәр үҙҙәренә апрель айы планын тағы ла күберәк арттырып үтәү бурысын ҡуйҙылар.

Цех апрель айы заданиеһен срогынан биш көн алда үтәргә йөкләмә алды.

Һүрәттә: 5-се номерлы цехта йөкләмәгә ҡул ҡуйыу. (Алғы рәттә, уңдан һулға) участка мастере А. И. Авдонин һәм стахановка З. Х. Хәбибова (договорға ҡул ҡуя). Е. Пржевский фотоһы.

☆

Шахтерҙарҙың производство уңыштары

«Башзолото» тресы прискаларының, рудниктәренең шахтерҙары төп продукция биреү, рудникшахталарға крепёж материалдары һәм яғыулыҡ етештереү буйынса беренсе квартал планын срогынан алда тамамланы.

Тресттың предприятиелары араһында Учалы руднигы (начальнигы иптәш Рыбаков) алдынғы урында бара. Үҙенең производство планын айҙан-айға үтәп барыусы был коллективҡа, Учалылағы Ленин исемендәге старателдәр артеленә тресттың һәм алтын промышленносе работниктәре профсоюзы Үҙәк Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байраҡтары бирелде.

Шулай уҡ Байкара руднигы һәм башҡа рудниктәрҙәге күп кенә старателдәр артелдәре коллективтәре лә беренсе кварталда яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр.

К. Фәйзи.

Күмер сығарыу планы арттырып үтәлде

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Альшеуголь» шахтаһы коллективе намыҫлы эшләп, беренсе кварталда күмер сығарыу планын 102 процентҡа үтәне. Ташыу планы шулай уҡ уңышлы үтәлә. Өс айҙа шахталарҙан тимер юл станцияһына 4000 тонна күмер ташылды.

Шахта коллективе 1 майҙы достойно ҡаршылау өсөн байрам алды социалистик ярышына ҡушылды һәм апрель айы планын 20 көн эсендә үтәп сығыуға йөкләмә алды.

Алдынғы забойщиктәр Ильин, Новиков һәм Тажиев иптәштәр социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәп, һәр сменала 1,5—2 норма бирәләр.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Дүрт айлыҡ планды — 20 апрелгә

Директоры иптәш Орел булған завод коллективе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн ярышып, беренсе квартал планын 10 процентҡа арттырып үтәне, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 9 процентҡа кәметте.

Коллектив май алды ярышына ҡушылып, дүрт айлыҡ планды 20 апрелгә үтәргә һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 10 процентҡа кәметергә йөкләмә алды. Хәҙер цехтар араһында ярыш ҡыҙғандан-ҡыҙа бара.

„Маршалл планы“ һәм „Көнбайыш союз“

Америка империалистәре үҙҙәрен-үҙҙәре бөтөнләй фаш иттеләр. Тәүҙә улар, АҠШ «Маршалл планы» менән, имеш, «һис бер төрлө эгоистик ынтылыштарҙы һәм иҫәптәрҙе байламай», тип иҫбат итергә бөтөнләй холдән тайғансы тырышҡайнылар, оҙаҡламай уларға «Маршалл планының» ысын могоноһен асып һалырға тура килде. Хәҙер инде улар үҙҙәре уҡ, унда АҠШ-тың экономик, стратегик һәм политик интерестәре бергә ҡушыла, тиҙәр. АҠШ президенты янында сит ил государстволарына ярҙам буйынса Гарриман етәкселек иткән Консультатив комитеттең докладында тап ошондай таныуҙы күрәбеҙ бә. «Америка Ҡушма Штаттарының Европалағы интерестәрен, — тип уҡыйбыҙ беҙ докладта, — тик экономик факторҙарҙан ғына сығып ҡарарға ярамай. Улар шулай уҡ стратегик һәм политик характерҙәләр».

Ябай телгә күсереп әйткәндә был — «Маршалл планы» Көнбайыш Европаға Американың империалистик экспансияһының асыҡтан-асыҡ программаһы булып тора, тигән һүҙ.

Америка монополистик капиталының Европаға күҙ төбәүе беренсе тапҡыр ғына түгел. Беренсе бөтә донъя һуғышынан һуң уҡ ул Рур магнаттары менән үҙенең бәйләнешен көсәйтеү өсөн, Германияның концерндарын үҙ ҡулдарына алыу һәм Европала үҙенең позицияһын нығытыу өсөн Германияның еңелеүенән файҙаланырға тырышты. Америка генералы Дауэс, ә унан артынан банкир Юнг ул саҡта «Дауэс планы» һәм «Юнг планы» исемдәре менән билдәле булған программа—Германия империализмена Америка ярҙамының айырым программаһын эшләнеләр.

Был ике пландың да нигеҙендә бер маҡсат — Германияны Советтарға ҡаршы политика ҡоралына әйләндереү, уның империалистик ынтылыштарын Көнсығышҡа юнәлдереү маҡсаты ята ине. Ләкин, бер яҡтан Дауэс һәм Юнг пландары менән, икенсе яҡтан, «Маршалл планы» араһында тулыһынса тигеҙлек билгеһе ҡуйыу хата булған булыр ине. Икенсе бөтә донъя һуғышы һөҙөмтәһендә Америка империализме үҙенең экспансияһының элекке формалары һәм күләмдәре менән һис тә ҡәнәғәтләнмәй инде. Хәҙер һүҙ Америка монополияһының Көнбайыш Европа экономикаһының айырым тармаҡтарында ғына, ә беренсе нәүбәттә Көнбайыш Европала үҙенең йоғонтоһон киңәйтергә тырышыуы һәм үҙенең позицияларын нығытырға тырышыу тураһында ғына бармай. Америка империализме хәҙер күҙен байтаҡ алыҫҡа төбәй. Ул көн тәртибенә бөтә Көнбайыш Европаны «Маршалл планы» нигеҙендә һәм уның ярҙамында Америка континентена булмағанда ла, һәр хәлдә америкалаштырылған континентҡа әйләндереү, йәғни АҠШ-тың колониаль вотчинаһына әйләндереүҙе ҡуя.

«Маршалл планына» тулы баһаны беҙ совет профсоюздарының күптән түгел беҙҙең матбуғатта баҫылып сыҡҡан Декларацияһында табабыҙ. «Маршалл планы»,— тип әйтелә Декларацияла, — Көнбайыш Европа илдәренең суверенитете һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн тураҙан-тура ҡурҡыныс булып тора. «Маршалл планы» Көнбайыш Европаның экономикаһын Америка промышленносе магнаттары интерестәренә буйһондороуға иҫәп ителгән. Ул фактик алғанда Көнбайыш Европа илдәренең промышленносе, тышҡы сауҙаһы, финансы өҫтөнән контролде Америка монополистәре ҡулына күсерәсәк».

Американың идара итеүсе круглары был экспансионистик программаны ниндәй средстволар менән тормошҡа ашырырға уйлайҙар? Һис шикһеҙ, был средстволар араһында Америка монополистәренең үҙҙәре тарафынан байтаҡ дәрәжәлә яһалма рәүештә тыуҙырылған «доллар аслығы» тип аталған нәмә күренекле урындарҙы береһен алып тора. Һуғыш ваҡытында һәм һуғыштан һуңғы йылдарҙа улар бөтә капиталистик илдәрҙән тип әйтерлек доллар һәм алтын фондтарын һығып алып бөтөрҙөләр. Был — төрлө юлдар менән, ләкин, башлыса, Көнбайыш Европа илдәрендә АҠШ-тың сауҙа экспансияһы ярҙамы менән башҡарылды.

Көнбайыш Европаның баҙарҙарын шул юл менән үҙенә буйһондороп, уларҙан үҙенең конкуренттарын ҡыҫырыҡлап сығарып, АҠШ шул уҡ ваҡытта Көнбайыш Европаның АҠШ-ҡа тауар сығарыуының үҫеүенә ҡомасаулаһы һәм ҡомасаулай. Билдәле булғанынса, Американың Көнбайыш Европаға тауар индереүе менән Көнбайыш Европаның АҠШ-ҡа тауар сығарыуы араһындағы бик ҙур һәм һаман үҫә барған айырма шуға килтерҙе — Көнбайыш Европа илдәре үҙҙәренең доллар фондтарын фактик алғанда бөтөрҙөләр һәм АҠШ-тан бойондороҡло хәлгә электеләр.

АҠШ-тың Көнбайыш Европаға сауҙа экспансияһы һис күрелмәгән күләмдәргә барып етте. Әгәр 1936—1938 йылдарҙа АҠШ-тың Европаға тауар сығарыуы йылға уртаса 1 миллиард 250 миллион доллар тәшкил иткән булһа, йәғни Европаның АҠШ-ҡа тауар сығарыуынан 500 миллион долларға артып киткән булһа, 1946 йылда тауар сығарыу 7 миллиард доллар тәшкил итте, йәғни тауар индереүҙән 5,5 миллиардҡа артып китте.

1947 йылдың 7 айы эсендә генә АҠШ-тың Англия менән 600 миллион доллар, Франция менән—500 миллион доллар, Бельгия менән—250 миллион доллар суммаһында актив сауҙа балансы булды.

«Маршалл планының» иң мөһим бурыстарынан береһе киләсәктә лә «доллар аслығын» бөтөрөүгә юл ҡуймауҙан тора.

АҠШ-тың государство департаменте сенаттың сит ил эштәре комиссияһына иҫәптәр тапшырҙы, быкан шул күренә: «Маршалл планы» буйынса финанс ярҙамынан тыш Англияға — 4 йыл эсендә 5,5 миллиард доллар самаһы, Францияға — 4 миллиард самаһы, Италияға шул уҡ ваҡыт эсендә 3 миллиард доллар тип әйтерлек, Голландияға 2,5 миллиард доллар, Көнбайыш Германияға — 2,5 миллиард доллар, Бельгияға һәм Люксембургҡа — 1,5 миллиард доллар талап ителәсәк.

Ул ғына ла түгел, «Маршалл планы» иҫәп тотолған осорҙоң аҙағына, йәғни 1951—1952 йылдарға, юғарыла һаналып үтелгән илдәрҙә доллар етешмәүселеге тап хәҙерге ваҡыттағы кеүек булғасағы ла иҫәпләп сығарылған. «Маршалл планы», тип яҙа Американың «Обсервер» тигән газетаһы. Европа экономикаһының төп ауырыуы — доллар етешмәүселегек һаман һыҡмай.

• • •

Промышленность өлкәһендә «Маршалл планы» Көнбайыш Европа илдәрен үҙ алдына йәшәүгә булған һәр төрлө мөмкинлектәрҙән мәхрүм итә. «Американың идара итеүсе круглары, — тип әйтелә совет профсоюздары Декларацияһында, — Көнбайыш Европа илдәренең үҙҙәренең милли производство пландарын үҙ алдарына билдәләүгә булған суверенный хоҡуҡтарынан баш тартыуҙарын «ярҙам» тип аталған нәмәне алыуҙың төп шарты итеп ҡуйлар. Киләсәктә был пландар Америка администрацияһы менән мотлаҡ килешелерелергә тейештәр».

«Маршалл планы» Көнбайыш Европа илдәренән бойондороҡһоҙлоғон тәьмин итеүҙә беренсе дәрәжәләге ролде уйнаған металлургия, машиналар төҙөү, суднолар төҙөү һәм промышленностең башҡа тармаҡтарын түндырып ҡалдырыуға иҫәп ителгән. Ул, бер яҡтан, капиталь төҙөлөш программаһының ҡыҫҡартылыуын, ә икенсе яҡтан Американың Көнбайыш Европаға тауар индереүенең Көнбайыш Европа экономикаһының үҫә барған ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүгә бөрынан да аҙыраҡ иҫәп ителгән характерен билдәләй.

Көнбайыш Европа баҙарҙарында үҙенек монополия хәленән һәм Көнбайыш Европа илдәренең АҠШ-тан доллар бойондороҡлолоғонда булыуынан файҙаланып, Американың монополистик капиталы Көнбайыш Европаға мәжбүри ассортимент массалары, йәғни Америкала үтмәгән һәм шул уҡ ваҡытта Көнбайыш Европаның экономикаһын аяҡҡа баҫтырыу өсөн беренсе дәрәжәлеге әһәмиәте булмаған тауарҙар индерә.

Нью-Йоркта сыға торған «Нейшнл сити бэнк» 1947 йыл декабрь номерендә АҠШ-тың экономик хәлена һәм государство финансына яһаған күҙәтеүендә быны таный. Күҙәтеүҙе төҙөүсенең таныуы буйынса, Гарриман комитете, «Маршалл планы» буйынса Американың Көнбайыш Европаға тауар сығарыуҙарының программаһын асыҡлап, АҠШ Европаға промышленность оборудованиеһен бөтөнләй сығармаясаҡ, тип белдергән.

«Маршалл планы» шулай уҡ Көнбайыш Европала ауыл хужалығының үҫеү темптарын тотоп тороуға иҫәп ителгән. АҠШ-тың игенселек министре Андерсон бындай «установканың» нигеҙендә ятҡан мотивтарҙы маҡтансыҡ асыҡлығы менән әйтеп бирҙе. Европаға ашлыҡ-түлек сығарыуҙан башҡа, — тип белдерҙе ул, — Америка экономикаһы алдында серьез ауыл хужалығы проблемаһы килеп баҫҡан булыр ине, сөнки АҠШ-тың сәсеү майҙаны ҡасан да булһа булғанға ҡарағанда күп һәм ауыл хужалығы продукттарының артыҡ етештерелеүенең реаль ҡурҡынысы бар. Америка экспансионистәренең был саҡта иң тиклем оптһыҙлыҡҡа барып етеүҙәрен шунан ғына булһа ла күреп була: Гарриман комитете Көнбайыш Европаның ауыл хужалығын артабан механизациялауҙын маҡсатҡа ярашлымы, юҡмы икәнлеге тураһында мәсьәлә ҡуйҙы.

Көнбайыш Европаның айырыуса киҫкен кризис кисергән малсылығына килгәндә, шул уҡ Гарриман комитете [illegible] һаны[illegible] кәметеүҙе талап итә. Шулай итеп, әгәр хатта Көнбайыш Европа экономистәренең иң оптимистик иҫәптәре буйынса ла 1952 йылға ит етештереү һуғышҡа тиклемге кималдең 90 процентен генә тәшкил итһә, Гарриман ку[illegible]ның йәшәү һөҙөмтәһендә [illegible] ла түбәнәйәсәк.

(Дауамы 3-сө биттә).

Сәсеү алды әҙерлек эштәрен тиҙерәк тамамларға!

Ҡандра районында яҙҙың килеп етеүен һиҙмәйҙәр

Ҡандра районының бөтә колхоздарында ла яҙғы сәсеүгә әҙерлеккә үҙ-ара тикшереү үткәрелде.

Был тикшереү сәсеүгә әҙерлектә ҙур етешһеҙлектәрҙе асты. Баҫыу эштәре башланыуға аҙ ғына ваҡыт ҡалыуға ҡарамаҫтан, район орлоҡ туплау планын 84 процентҡа ғенә үтәгән. Ә ҡайһы бер колхоздарҙың хатта сәсеү майҙанының яртыһын ҡапларлыҡ та орлоҡтары юҡ. Был колхоздарҙың етәкселәре орлоҡто һаман да государствонан алыуға ышанып, уны урында табыу сараһын күрмәйҙәр. Юғары урожай өсөн көрәштә «Игенсе» колхозы менән социалистик ярышҡа сыҡҡан «Урта күл» ауыл хужалығы артелендә сәсеүгә әҙерлек бигерәк тә ҡурҡыныс хәлдә. Бында орлоҡ туплау ни бары 59 процентҡа ғына үтәлгән. Ҡара бойҙай, тары, кенбағыш орлоҡтары әле кенә тиклем таҙартылып, сәсеү кондицияһына еткерелмәгәндәр. Етешмәгән орлоҡто табыу сараһы күрелмәй.

Колхоздың йәнле тартыу көстәре лә етешмәй. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, 13 баш ат егергә ярамһыҙ. Улар айырым тәрбиәгә ҡуйылмағандар, үгеҙҙәрҙе һәм колхозсыларҙың һыйырҙарын егергә өйрәтеүҙе ойоштороу менән колхоз етәкселәре бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу баҫыу эштәренең уңышын хәл итәсәк. Ләкин был мөһим тармаҡҡа тейешле иғтибар бирелмәй. Звенолар формаль рәүештә генә ойошторолғандар. Уларға әле булһа ер участкалары һәм инвентарҙар беркетелмәгән. Колхоз председателе иптәш Абзалов был хәл һис борсомай, ул әле ҙур етешһеҙлектәрҙе күрергә теләмәйенсә, тыныс ҡына йәшәүҙе дауам итә.

«Алға» колхозының да 300 центнерҙан артыҡ сәсеү орлоғо етешмәй. Колхоз председателе иптәш Солтанов: государство колхозды орлоҡһоҙ ҡалдырмаҫ әле, — тип орлоҡ фондын тулыландырыу мәсьәләһе менән шөғөлләнеүҙе бөтөнләй туҡтатҡан. Тикшереү һөҙөмтәһендә 20 һабан, 5 тырма, бер сәскестең ремонтланмағанлығы беленде. Баҫыуға орлоҡ ташыу өсөн арба, тоҡ, көйөк һәмәләр ҙә етешмәй. «Ҡаран йылға», «Кереш» (Ҡарамалы Ғөбәй ауыл Советы) колхоздарында ла сәсеү орлоҡтарын таҙартыу әле кенә тиклем тамамланмаған. Был колхоздар сортһыҙ орлоҡтарҙы сортлы орлоҡтарға алмаштырыу эштәрен дә һүҙалар.

«Ҡандра», «Байтал», «Иштуған», «Ҡыҙыл таң» ауыл хужалығы артелдәрендә лә сәсеүгә әҙерлек эштәре бик һүлпән бара. Был колхоздарҙа звенолар ойоштороу һаман тамамланмаған. Агротехник саралар планы үтәлмәй, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға әҙерлек алып барылмай.

Район ауыл хужалығы бүлеге һәм колхоз етәкселәре был сөрьёз етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ашығыс саралар күрергә, сәсеүгә тулы әҙерлек менән килеүҙе тәьмин итергә тейештәр.

Г. Ғәзизуллина.

Яғыулыҡты сәсеү ваҡытында ташырға уйлайҙар

Яҙғы ташҡын осоронда Ағиҙел йылғаһы Петровск МТС-ы менән Стәрлетамаҡ нефть базаһы араһындағы юлды бөтөнләй өҙәсәк. МТС етәкселәренә яғыулыҡ ташыуҙы март айында тамамламағанда, ҡыҫыу сәсеү осоронда бик күп тракторҙарҙың тик ултырасағы бик яҡшы билдәле ине.

Ләкин улар «һалыр урын юҡ» тигән һылтауҙар менән ғинуар айында уҡ яғыулыҡ ташыуҙы туҡтаттылар. МТС директоры вазифаһын үтәүсе иптәш Иванов колхоздарҙа булған мисканарҙы файҙаланыуҙы ойошторманы. Хатта ул был турала колхоз етәкселәренә мөрәжәғәт тә итмәне. Бына шуның һөҙөмтәһендә 120 тонна урынына, ни бары 82 тонна керосин, тик 4 тонна автол һәм 2,5 тонна лигроин ташылған. Былар тракторҙарға бары тик бер аҙна эшләргә генә етәсәк.

Газогенераторлы тракторҙар өсөн чурка әҙерләү эше лә шулай уҡ өҙөлдө. 500 кубометр урынына, ни бары 167 кубометр чурка әҙерләнгән. МТС етәкселәре был турала колхозларға заданиелар биреү менән генә сикләнеп ҡалғандар, был мөһим эштең үтәлеүен талап итмәйҙәр.

Ғ. Котлобаев.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Киндерҙән юғары урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ

Киндер орлоғо һәм сүсенең халыҡ хужалығы өсөн әһәмиәте ҙур. Шуға күрә лә беҙ игенселек, малсылыҡ һәм хужалыҡтың башҡа ярҙамсы тармаҡтарын үҫтереү эштәрен өлгәлә ҡуйыу менән бергә, киндер етештереүгә лә ныҡлы иғтибар бирәбеҙ.

Киндер культураһы сәселә торған 23 гектар майҙан Ыҡ йылғаһы буйына урынлашҡан. Ул участканы яҙ һыу баҫа, һыу ҡайтыу менән дымды күберәк һаҡлап ҡалыу өсөн беҙ ерҙе арҡылы-буйға һөрәп, ике ҡат тырмалайбыҙ. Шунан һуң, участканы 11,5-әр гектарҙан торған ике тигеҙ өлөшкә бүлеп, береһенә киндер сәсәбеҙ, ә икенсеһенә картуф ултыртабыҙ. Икенсе йыл культуралар алмаштырыла. Киндерҙән дә, картуфтан да юғары урожай алына.

Үҙған йыл киндер үҫтереүҙә ике звено эшләне. Урожай 1945 йылға ҡарағанда 4 тапҡырға артығыраҡ булды. 11 гектар киндер сәсеүселәрҙән һәр бер гектарынан уртаса 35-әр бот киндер орлоғо, 300-әр бот киндер алдыҡ. Был эште эшләүсе колхозсыларға өҫтәмә түләү тәртибендә 600 бот киндер, 45 бот орлоҡ бирелде. Беҙҙең шарттарҙа киндерҙән тағы ла юғарыраҡ урожай алырға мөмкин. Быны алдынғы звеноларҙың тәжрибәләре яҡшы күрһәтте. Мәрфуға Әкмәева етәкселек иткән звено икенсе звеноға ҡарағанда киндер орлоғон 9-ар ботҡа артығыраҡ алды.

Быйыл был культураны үҫтереү буйынса ес звено төҙөлдө, һәр звеноға 3,67-шәр гектар участка бүленеп бирелде. Был участкаларға 1000 йөк серегән тиреҫ сығарылды. Колхоздың агротехнигі Хәйҙәр Шакиров иптәш звено [illegible] киндерҙән нисек итеп юғары урожай алырға кәрәклеге өйрәтте.

Алтай крайы игенселәренең сағыштырып [illegible] тәжрибәһен өйрәнгәндән һуң, иптәш Әкмәева звеноһы киндерҙән һәр бер гектарынан 42-шәр бот орлоҡ, 380-шәр бот киндер үҫтереп алырға һүҙ бирҙе һәм башҡа звеноларҙы социалистик ярышҡа саҡырҙы.

Колхоз экономикаһын күтәреүҙә ярҙам итеүсе һәм халыҡ хужалығы өсөн бик кәрәкле булған был культураны сәсеү майҙанын 1950 йылға беҙ ике тапҡырға арттырасаҡбыҙ.

Б. Сәләймәнов,
Шаран районы, Фрунзе исемендәге колхоз председателе.

Механизаторҙар мул урожай үҫтереү өсөн тырышалар

1948 йылда мул урожай үҫтереү өсөн беҙҙең Ҡалмыҡ МТС-ы (Бөрәй районы) механизаторҙары бөтә сараларҙы күрәләр. МТС 1947 йылға ҡарағанда, 1948 йылда 8500 гектар ерҙе артыҡ эшкәртеү йөкләмәһен алды. Б. Таһиров, К. Билалов, И. Миркәйҙаров һәм Ғилфанов етәкселек иткән бригадалар быйыл 15 ат көсөнә һәр бер тракторға 1000—1150 гектар ер эшкәртеүҙе бурыс итеп ҡуйҙылар. Шулай уҡ комбайнерҙар ҙа былтырғыға ҡарағанда быйыл 1500 гектарға артыҡ майҙанда урожай йыйырға йөкләмә алдылар.

Йөкләмәләрҙе үтәү өсөн ныҡышмалы әҙерлек бара. Механизаторҙарҙың квалификацияһын күтәреү, яңы кадрҙар әҙерләү эшендә байтаҡ эштәр үткәрелде. 3 ай ваҡыт эсендә 38 тракторист, 16 учетчик, 72 прицепщик, 20 агротехник әҙерләнде.

К. Сабиров,
Ҡалмыҡ МТС-ы директорының политик эш буйынса урынбаҫары.

Сафина звеноһының өлгәлә эше

1947 йылдағы өлгәшеүҙәре өсөн ВЛКСМ Өлкә Комитеты тарафынан Почет грамотаһы менән наградланған Зөһрә Сафина етәкселек иткән звено быйыл да юғары урожай үҫтереү өсөн көрәшә. Янаул районының «Урал» колхозындағы был алдынғы звено быйыл 10 гектар бойҙайҙан һәр гектарынан 25-әр центнер урожай алырға бурыс итеп ҡуйҙы. Звено ағзалары [illegible] 200 йөк тиреҫ, 30 центнер көл, 10 центнер ҡош тиреһе әҙерләнеләр. Хәҙер [illegible] ҡар һыуын тотоу һәм [illegible] сәсеү материалдары [illegible].

Звено члендәре агротехник түңәрәктә 14 темаға занятие үткәрҙеләр. Инде 14 темаға занятие үткәрелде.

Звеноға беркетелгән ауыл хужалығы инвентарҙары, тартыу көстәре, сәсеү материалдары тулыһынса әҙер.

М. Фәтхиев.

43 тракторист әҙерләнде

Зианчура районы Һурән машина-трактор станцияһы эргәһендә асылған трактористар курсында 43 кеше уҡып сыҡты. Курсанттар уҡыуҙың тәүге көндәренән үк үҙ-ара социалистик ярышты киң йәйелдереп, тик отлично һәм яҡшы билдәләренә генә уҡырға йөкләмә алғайнылар. Улар үҙҙәренең йөкләмәләрен намыҫ менән үтәнеләр. Күптән түгел, курсанттарға экзамен үткәрелде. 13 кеше экзаменде отличноға, 30 кеше яҡшы билдәһенә тапшырҙы.

Курсты тамамлаусылар колхоздарға эшкә ебәрелделәр.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР

Дәреслектәр юғары сифатлы булһын

Башгосиздат йыл һайын бик күп дәреслектәр баҫып сығара. Ләкин уларҙың сифатына иғтибар бирелеп етмәй. Бына беҙҙең ҡулыбыҙҙа иптәш Х. Усман тарафынан дүртенсе кластар өсөн төҙөлгән «Тыуған ил» дәреслегенең етенсе баҫмаһы. Ул үҙған йылдың һуңғы айҙарында донъяға сыҡты.

Был уҡыу китабында сөрьёз етешһеҙлектәр бар. Унда йөкмәткеһе менән ярлы, художество яғынан түбән очерктәр, шиғырҙар һәм хикәйәләргә урын бирелгән.

Мәҫәлән, Советтар Союзының ике тапҡыр Геройы Муса Гәрәев китапҡа урынлаштырылған очерк буйынса тик атаһы һөйләгән әкиәттәрҙә генә тәрбиәләнеп, герой булған булып сыға. Был очеркта бөтәбеҙгә лә ҡәҙерле һәм данлы Муса Гәрәевте тәрбиәләгән общественный среданың йоғонтоһо, комсомол һәм партия ойошмаларында тәрбиәләнеүе күрһәтелмәй. Был хәл менән, әлбиттә, ризалашып булмай.

Дәреслектә шулай уҡ ҡарт яҙыусыларыбыҙҙың, яҡшы ғына әҫәрҙәре барлығына ҡарамаҫтан, уларҙың иң уңышһыҙ әҫәрҙәре миҫалға алынған. Мәҫәлән, Ғ. Ғүмәрҙең «Нисек отличник булырға» тигән әкиәтенең дәреслеккә индерелеүҙән ниндәй файҙа булыр икән һуң? Был әкиәттә уҡыуынан өлгәшмәүсе баланан уҡыусылар көләләр, һәм ул нисек отличник булыуҙың серен эҙләп, сәйәхәткә сығып китә. Айҙар буйы йөрөй, күп йәнлектәр, кешеләр күреп, ҙур аралыҡ үтеп «бөйөк кеше» янына барып етә. Был ваҡыт эсендә инде уҡыу йылы ла бөткән булғандыр, һәм «бөйөк кеше» уға серҙе сисеп бирә. Отличник булыу мәсьәләһен бит мәктәптә лә шул уҡ отличник иптәштәр менән хәл итергә мөмкин. Ғөмүмән, автор был «серле йомғаҡлы» серле әкиәттең балалар өсөн ниндәй политик-тәрбиәүи әһәмиәтен тапҡандыр.

Дәреслектең поэзия өлөшө лә шулай уҡ иң уңышһыҙ шиғырҙарҙан тора. Мәҫәлән, «Ишембай», «Оҙатыу», «Хасан күле» тигән шиғырҙар аңлайышһыҙ, художествоһыҙ, формаль яҙылғандар. Уларҙы 4-се класс уҡыусыларына поэзия өлгөһө итеп биреү, минеңсә, авторҙың был өлкәлә сөрьёз эшләмәүенән килеп сыҡҡан булырға кәрәк. Беҙҙә яҡшы, политик йөкмәткеле, ысынбарлыҡты дөрөҫ күрһәтеүсе һәм юғары художестволы сифатлы шиғырҙар аҙ түгел.

Балаларҙы тәрбиәләргә, уларҙы грамотаға һәм культуралы телгә өйрәтеүгә билдәләнгән был уҡыу китабында буталсыҡтар, стилистика һәм орфография хаталары шулай уҡ йыш осрай.

Уҡыусы балаларыбыҙға тулы ҡиммәтле, дөрөҫ эстәлекле, художество формаларға бай китаптар бирергә әллә ҡасан ваҡыт инде.

Был турала бөтәһенән элек Мәғариф Министерствоһы ҡайғыртырға тейеш. Минеңсә, дәреслектәр төҙөү эше алдағы көндә коллектив рәүештә эшләнергә, ә бер генә автор продукцияһы булмаҫҡа тейеш.

Мәҡсуд Сөндөклө.

Беҙҙең дә радио тыңлайһыбыҙ килә

Бер нисә йыл инде, Учалы район үҙәгендә көсәтле радио узел эшләп килә. Уның көсө, Учалы ауылын ғына түгел, уға күрше ауылдарҙы ла хеҙмәтләндерергә етерлек.

Беҙ ошо мөмкинлекте белеп, радио узел мөдире иптәш Доронинда Өргөн ауылына радио точкалар ҡуйыуҙы һораныҡ. Ләкин ул беҙҙең һорауҙы иҫәпкә алманы.

Район үҙәгенә яҡын торған ауылдарҙы (шул иҫәптән беҙҙең Өргөн ауылын да) радиолаштырыу турала республикан һәм район ойошмаларының да күрһәтмәләре бар. Иптәш Доронин был күрһәтмәләрҙе лә үтәгәнсе юҡ. Ошо арҡала, радио тыңлаусылар һаны артмай. Радио точкалар бынан ун йыл элек күпме булһа, ул хәҙер ҙә шул һанда ҡалып килә.

Беҙ — Өргөн ауылы хеҙмәтсәндәре, район советы исполкомынан Доронин иптәштең эшенә иғтибар итеүҙе — ауылдарға радио индереү өсөн конкрет саралар күреүҙе һорайбыҙ. Беҙҙең дә радио аша төрлө яңылыҡтар һәм концерттар тыңлайһыбыҙ килә.

Н. Кагиров.
М. Мөхәмәтов.

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары эҙенән

„Яғыулыҡ ташып ҡуйыуға ашыҡмайҙар"

Ошо баш аҫтында гәзитебеҙҙең 13 март номерендә тәнҡит материалы баҫылып сыҡҡайны.

Был мәсьәлә буйынса ВКП(б)-ның Асҡын райкомы секретары иптәш Литвинов редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

— Гәзиттә баҫылған материал ВКП(б) райкомы бюроһында, хеҙмәтсәндәр депутаттарының Асҡын район Советы исполкомында, шулай уҡ Асҡын, Урмияз МТС-тары советтарында тикшерелде һәм дөрөҫ, тип табылды.

Тракторҙар өсөн яғыулыҡтар ташыу буйынса күрелгән саралар һөҙөмтәһендә эш байтаҡ үҙгәрҙе. 1948 йылдың яҙғы сәсеү осоро өсөн ике МТС-ҡа 10 тонна бензин кәрәк булһа, ул 21 тонна, ә керосин 242 тонна урынына 225 тонна, автол 26,3 тонна урынына 5,7 тонна, чурка 941 кубометр урынына 1.856 кубометр әҙерләнде. Ташылып бөтмәгән яғыулыҡтарҙы МТС-тарға йылдам килтереү өсөн бөтә саралар күрелә.

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

Шул уҡ ваҡытта, АҠШ игенселек министры Андерсондың белдереүенсә, АҠШ «Маршалл планы» йәшәгән тәүге ике йылда Европаға һыйыр, һарыҡ һәм сусҡа итө ебәрмәйәсәк.

«Маршалл планы» ярҙамында АҠШ Көнбайыш Европа илдәренең финансы өҫтөнән контролде үҙ ҡулдарына алырға һәм долларҙың ғәмәлдә халыҡ-ара берҙән-бер валюта булып әүерелеүенә ирешергә иҫәп итә.

Быға Америка монополистәренең Көнбайыш Европа илдәренең судно төҙөү программаһын өҙәүгә ныҡлы курс алыуҙарын да ҡушырға кәрәк. Бында тупаҫ иҫәп — был илдәрҙе Американың сауҙа флотын арендаға алыу системаһына күсергә мәжбүр итеү иҫәбе хәрәкәт итә, был, тәбиғи рәүештә, Көнбайыш Европаның тауар сығарыуына удар яһаясаҡ.

Бер үк ваҡытта «Маршалл планы» бөтә Көнбайыш Европа илдәренең Ҡушма Штаттарға мотлаҡ стратегик сырьё сығарыуҙарын күҙҙә тота.

Үҙенән-үҙе аңлашыла, Америка монополистәре Көнбайыш Европа илдәренең экономика өҫтөнән государство контроленең һәр төрлө проекттарынан, ә бигерәк тә экономиканың айырым тармаҡтарын национализациялауҙан ҡырҡа баш тартыуҙарына өлгәшергә ныҡышалар.

Үҙҙәренең империалистик программаларының үтәлеүен еңеләйтер өсөн Американың идара итеүсе түрҙәре Көнбайыш Европа илдәренең таможенный союзы тип аталған союзын төҙөүҙе талап итәләр. Америка монополистәре АҠШ-та, үҙҙәрендә, етештереп индерелгән тауарҙарға айырыуса юғары хаҡтарҙы һаҡлап ҡалдырып, Көнбайыш Европала иһә улар етештергән тауарҙарҙың хаҡын киҫкен рәүештә арзанайтыу нигеҙендә «таможенный союз» төҙөйҙәр. Шулай итеп, «таможенный союз» Америкаға Көнбайыш Европа баҙарҙарында Американың тотҡарлыҡһыҙ экспансияһы өсөн ерлек таҙартыуҙа ярҙам итергә саҡырылған. Көнбайыш Европаның хәҙерге шарттарында «таможенный союз» унда ҡатнашыусы илдәрҙең экономик яҡтан үҙҙәрен үҙҙәре үлтереүҙәрен аңлатасаҡ. «Маршалл планы» — Көнбайыш Европаны юғәнһеҙ рәүештә талау һәм колониаль эксплоатациялау программаһы булып торғанлығын таныу өсөн ниндәй ҙә булһа өҫтәмә иллюстрациялар тағы кәрәкме ни.

* * *

Икенсе бөтә донъя һуғышы бөткәндән һуң уҡ Америка империалистәре бөтә Европаны үҙҙәренә буйһондороуға иҫәп тоттолар. Ләкин уларға тиҙҙән «ҡабаттан ориентировка яһарға» һәм үҙҙәренең иҫәптәренә ҙур ғына төҙәтмәләр индерергә тура килде.

Бөйөк Советтар Союзының тыныслыҡ һәм халыҡтар иминлеге өсөн әҙмә-әҙ көрәше һөҙөмтәһендә, Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европала халыҡ демократияһының еңеүе Үҙәк Европа илдәрендә, Балкан ярым утрауы һәм Дунай бассейны илдәрендә «асыҡ ишектәр» политикаһы флагы аҫтында Американың хакимлек итеү пландарын өҙҙөләр. Уолл-стрит Көнбайыш Европала үҙенең хакимлеген урынлаштырыуға уның һайын күберәк ынтылыш менән тотона башланы. Бөтә Европаны бүлгеләүҙең шарты һәм нигеҙләүсе булыусы йәһәтенән Германияны бүлгеләү был программаны тормошҡа ашырыуҙың хәл иткес методы булып әүерелде. Шулай итеп, АҠШ Германияла ғөмүмән Көнбайыш Европала Америка хакимлеге проблемаһын хәл итә.

Ялтала һәм Потсдамда ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы еҙеүгә юнәлтелгән Америка дипломатияһының политикаһы бына нәмәнән сығып эш итә.

АҠШ государство департаментының ҙур һәм бәләкәй чиновниктәренең Потсдам конференцияһы ҡарарҙарын Европала үҙгәргән обстановкаға ярашлы рәүештә үткәрергә кәрәклеге тураһындағы һүҙҙәре бик ҙур әһәмиәтлелек һәм ике йөҙлелек булып тора. Һуғыштан һуң Американың Европалағы стратегияһы Германия проблемаһын хәл итеүҙең Потсдамда расланған проблемаларының айырым моменттарен һәм бигерәк тә айырым деталдәрен генә түгел, бәлки бөтә программаһын һәм методтарын кире ҡаға. Шуға күрә Берлиндағы министрҙар Генеральный Ассамблеяһында Нью-Йоркта Америка делегацияһының яуаплы вәкилдәре тарафынан яһалған белдереү — киләсәктә АҠШ Ялта һәм Потсдам ҡарарҙарының рухын һәм хәрефен һаҡларға уйламай икәнлеге тураһындағы белдереү — Америка дипломатияһының оҙаҡ ваҡыттар буйы ниәтләгән практикаһының дауамы ғына.

АҠШ дипломатияһының Англия дипломатияһы менән берлектә үткәргән политикаһының Сит ил эштәре Министрҙары Советы һәм Потсдам конференцияһы ҡарарҙарына ярашлы рәүештә дүрт державаның Германияны ойошторған Контроль Советын бөтөрөүгә юнәлтелгәнлегендә шик юҡ.

Америка монополистәренең Көнбайыш Германиялағы позицияһын [illegible] Даллес 1948 йылдың [illegible] былай тип белдерҙе: «Америка Ҡушма Штаттары үҙҙәре Көнбайыш Европа хөкүмәте булып торалар... Етәкселек нөктәһенән ҡарағанда ла, шулай уҡ материаль ярҙам нөктәһенән ҡарағанда ла беҙ Көнбайыш Германия хөкүмәте сифатында башҡа ниндәй ҙә булһа юл менән булғанға ҡарағанда ла күберәк эшләй алабыҙ».

Көнбайыш Европала Америка империалистәренең стратегияһының генеральный курсын асып биреүсе был әһәмиәтле белдереүҙәрҙең мөғәнәһенә төшөнөргә генә. Көнбайыш Германияны Америка управлениеһы аҫтында айырым государствоға әйләндереү, Рур бассейнын Американың төп таяныс сифатында файҙаланыу (бөтә Көнбайыш Европа Рур бассейны тирәһенә һәм шул нигеҙҙә «ойоштороласаҡ» тейешле) өсөн Германияны бүлгеләү — «Маршалл планында» күҙәтелгән был курс бына шунан тора.

Германия мәсьәләһе буйынса Лондонда үткәрелгән кәңәшмә айҡанлы Совет Хөкүмәтенең 1948 йыл 6 марттағы нотаһында был курстың — Бевин тарафынан формулировать ителгән һәм «Көнбайыш союз» программаһы исеме менән билдәле булған был курстың политик программаһы фаш ителә. «Хәҙерге ваҡытта, — тип әйтелә Совет Хөкүмәтенең нотаһында, — Великобритания хөкүмәте тарафынан «Көнбайыш союз» тип аталған нәмәне төҙөү планы күтәрелде. Был политик блокҡа Франция, Бельгия, Голландия, Люксембург, шулай уҡ Италия һәм Германияның Көнбайыш өлөшө әҙлән ителә, һәм, шуның менән бергә, Америка Ҡушма Штаттарының ҡатнашыуы күҙә тотола... Британияның был планының «Американың [illegible]» менән тығыҙ бәйләнгәнлеге, уның [illegible] һәм Көнбайыш Европала Американың [illegible] политик маҡсаттарын асып һалғанлығын белеү ҡыйын түгел».

Уның асылыҡ күҙ алдына килтереү өсөн төҙөлергә уйланған блокта ҡатнашыусыларҙың составын ғына тикшереп ҡарау ҙа етә. «Көнбайыш союз», уның инициаторҙарының фекеренсә, икенсе бөтә донъя һуғышында Гитлерға ҡаршы коалиция яғындағы государстволарҙы ла, шулай уҡ фашистик «ось» ҡатнашыусылар иҫәбенә ингән государстволарҙы ла (Германия, Италия) үҙ эсенә индерә. Шулай итеп, «Көнбайыш союз» билдәһендә Германия тарафынан империалистик агрессияның ҡабатланыу мөмкинлегенә ҡурҡынысына ҡаршы Европаның иминлеген тәьмин итеү өсөн төҙөлә тип әйтеп булмай. Киреһенсә, «Көнбайыш союз» составына демократиялаштырылмаған һәм демилитаризовать ителмәгән Көнбайыш Германияны индереү билдәлелектән хотолғоһоҙ рәүештә: АҠШ һәм Англияның империалистик дипломатияһы Рур магнаттары менән килешеү юлына баҫтылар, тигән һығымта килеп сыға. Ниндәй маҡсат менән? Тик бер генә маҡсат — Рур бассейнын яңынан Европа агрессияһының үҙәк плацдармына әйләндереү маҡсаты менән.

Германия мәсьәләһе буйынса Лондон кәңәшмәһе айҡанлы Совет Хөкүмәтенең нотаһында беҙ ошо һүҙҙәрҙе уҡыйбыҙ: «Беренсе һәм икенсе бөтә донъя һуғыштарының ауыр һабаҡтарын иҫәпкә алып, Европаның тыныслыҡ һөйөүсе государстволары Германия тарафынан яңы агрессия ҡурҡынысын булдырмаҫ өсөн килешеү төҙөргә ынтылдылар. Билдәле булған бөтә договорҙар, Англия-Совет һәм Франция-Совет хөкүмәттәре араһындағы үҙ-ара ярҙам тураһында 20 йылға төҙөлгән договорҙар, Советтар Союзының Европаның башҡа государстволары менән булған договорҙары, шулай уҡ Англия-Франция араһында төҙөлгән 1947 йылғы договор шуға нигеҙләнгәндәр. Германияның яңы агрессияһын булдырмау өсөн ошондай ынтылыш тыныслыҡ һөйөүсе бөтә халыҡтарҙың интерестәренә яуап бирә һәм Европаның бер төркөм государстволарын Европаның икенсе государстволарына ҡаршы ҡуйыуға килтереүе мөмкин түгел. Был договорҙарҙы төҙөшеү Европа халыҡтарының иминселегенә, һәм бөтә донъя тыныслыҡты ныҡытыуға булышлыҡ итте һәм итә».

Һәм, киреһенсә, агрессив «Көнбайыш союзды» төҙөү Европа халыҡтарының иминселегенең ысын интерестәре менән һәм бөтә донъя тыныслыҡты ныҡытыу менән бергә һыйыша алмай.

* * *

Тарихи тәжрибәнән бер төрлө лә һабаҡ алмаған Англия-Америка дипломатияһы һуғыштан һуңғы эпоханың яңы шарттарында һуғыштан элекке эпоханың тышҡы политика курсын — билдәле булыуынса, хурлыҡлы рәүештә емерелеү менән тамамланған тышҡы политика курсын үткәрергә уйлаған. «Көнбайыш союз» төҙөү программаһының Мюнхенлек һуғыштан элекке политик линияһын Черчилль тарафынан Фултонда әйтеп бирелгән һуғыштан һуңғы политик линия менән бергә ҡушыу булып торғанлығында һис шик юҡ. Бевин менән Маршалл үҙҙәренең остаздары итеп Чемберленде, Даладьене һәм Черчиллде һайлап алдылар.

Ярай, бындай политиканың берҙән-бер һәм мотлаҡ һөҙөмтәһе уның тулыһынса һәм һәләкәтле рәүештә банкротлыҡҡа төшәүе генә булыуы мөмкин һәм мотлаҡ шулай булыр.

М. Маринин.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 31 март. (ТАСС). Азат Греция радиостанцияһы Элефтери Эллада агентствоһының хәбәрен тапшырҙы. Был хәбәрҙә, монархистик фашистәр тарафынан демократик армияға ҡаршы яңы һөжүмдең әҙерләнеүе тураһында Эпирҙән алынған мәғлүмәттәр американлыларҙың Грециялағы граждандар һуғышында актив һәм туранан-тура ҡатнашлыҡ итеүҙәре тураһында тағы бер тапҡыр раҫлайҙар, тип әйтелә.

1948 йылдың 16 февралдәге приказында 8-се дивизияның 76-сы бригадаһы командиры бригадный генерал Асимакис Василис һалдаттарҙы һүҙ менән рухландырырға маташҡандан һуң приказдың 5-се параграфында былай тип яҙған: «Һеҙгә, беҙҙең менән шулай уҡ беҙҙең союзниҡбыҙ Американың офицерҙары барасаҡ, тип белдерәм. Уларҙа хәҙер беҙҙең физик һәләтлектәребеҙ тураһында бик яҡшы фекер тупланды. Был фекерҙе беҙгә ҡарата хөрмәткә әйләндереү беҙгә бәйлеле». Радиостанцияның белдереүенә ҡарағанда, үҙенең армияһының көслө булыуына ышаныс тыуҙырыр өсөн тырышҡанда был монархистик фашизмдең иң көслө дәлиле булып тора. Приказ монархистик фашистәрҙең хыянаттарын, уларҙың грек халҡынан тулыһынса айырым йәшәүен асып һала һәм шул уҡ ваҡытта Гречиялағы граждандар һуғышы өсөн Американың империалистәренең яуаплылығы тураһында һөйләй.

Радиостанция монархистик-фашистик армияның офицерҙарына һәм һалдаттарына сит илдәр интерестәре өсөн ҡан түкмәҫкә һәм Грецияның азатлығы өсөн халыҡ менән бергә көрәшергә саҡырып мөрәжәғәт итте.

АҠШ-та һайлау алды кампанияһы

НЬЮ-ЙОРК, 31 март. (ТАСС). Америка армияһының информацион хеҙмәт начальнигы генерал Паркс, Эйзенхауэр исеменән сығыш яһап булһа кәрәк, Эйзенхауэр «бер нисек ваҡиғала ла» демократик партиянан президентлек посына үҙ кандидатураһын күрһәтеүгә ризалыҡ бирмәйәсәк, тип белдерҙе. Эйзенхауэр үҙенең ғинуар айында яһаған белдереүенән һуң үҙ позицияһын үҙгәртмәне, һәм Паркс кампанияла ҡатнашырға Эйзенхауэр риза булыр, тип уйламай.

Шуға ҡарамаҫтан, либераль партияның политик комитеты Нью-Йорктағы кәңәшмәһендә 29 мартта резолюция ҡабул итте. Был резолюция демократик партиянан кандидат итеп Эйзенхауэрҙе күрһәтеүҙе талап итә. Шулай итеп, был резолюция Трумэнде яҡлауҙан формаль рәүештә баш тартыу булып торҙо.

Парксның 29 мартта яһаған белдереүе Эйзенхауэр кандидатураһын күрһәтеүгә йүнәлтелгән хәрәкәтте, һис шикһеҙ, көсһеҙләндерҙе лә, ул, шуға ҡарамаҫтан, президент посына күрһәтелгән Трумэн кандидатураһын алып ташлауға һәм уның урынына икенсе кешене табыуға йүнәлтелгән демократик партиялағы тырышлыҡтарҙы күрһәтә.

«П. М.» газетаһының Вашингтондағы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, демократик партия милли комитетенең күптән түгел Трумэнде нисек булһа ла башҡа кандидат менән алыштырыуҙы талап итеүсе меңәрләгән телеграммалар һәм хаттар алғанлығы хәбәрсегә билдәле булды.

Трумэндең һуңғы пресс-конференцияһы Трумэндең президент посына үҙенең кандидатураһын күрһәтеүҙән баш тартырға уйламағанлығын белдерҙе.

Республикан партияла президент посына кандидат күрһәтеү өсөн көрәш шулай уҡ көсәйә. Тәүге һайлауҙар Висконсин штатында 6 апрелдә һәм Небраска штатында 13 апрелдә билдәләнгән. Был һайлауҙар ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар. Президентлек посына кандидат булып күрһәтелеүе ихтимал булған Дьюи, киләһе аҙнала үҙенең ике штатҡа ла барырға уйлауы тураһында белдергән. Сенатор Тафт шулай уҡ Небраска штатына барырға һәм унда барғас телмәрҙәр менән сығыш яһарға уйлай. Висконсин штатында Дьюи, Макартур һәм Стассен яҡлы кешеләрҙең, ә Небраска штатында — Дьюи, Стассен Тафт, Уоррен, Ванденбург һәм Мартин яҡлы кешеләрҙең көстәрен һынап ҡарау үткәреләсәк.

Монтгомериҙең Бельгияға килеүе

БРЮССЕЛЬ, 1 апрель. (ТАСС). Англияның империя генеральный штабы начальнигы фельдмаршал Монтгомери Брюсселгә килгәс, Бельгияның милли оборона министре де Фретер тарафынан официаль рәүештә ҡабул ителде. Беседа 1 сәғәт буйына дауам итте.

Үҙенең бында килеүенең маҡсаты тураһында һөйләп, Монтгомери Бельгияға Бельгия армияһының һуғыш эшен өйрәнеү пунктарын күреү өсөн килгәнлеген белдерҙе. Мин,—тине ул,—Бельгия армияһында йәш кешеләрҙең хәрби эшкә өйрәнеү методтары менән бик ныҡ ҡыҙыҡһынамын.

«Суар» газетаһы Монтгомериҙең Бельгияға килеүен биш державаның күптән түгел Брюсселдә ҡул ҡуйған пактыһы менән бәйләй. «Монтгомериҙең бында килеүе Брюссель пактында күҙҙә тотолған үҙ-ара ярҙам буйынса Бельгияның хәрби ойошмаһына ҡағылышлы мәсьәләләрҙә фекер алышыуҙар өсөн файҙаламаҫ, тип раҫлау аҡылға ярашлы булмаҫ ине», тип яҙа газета.

АВСТРИЯҒА, ФРАНЦИЯҒА ҺӘМ ИТАЛИЯҒА «ВАҠЫТЛЫ ЯРҘАМ» ИТЕҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ ЗАКОН ПРОЕКТЫНА ТРУМЭНДЕҢ ҠУЛ ҠУЙЫУЫ

ВАШИНГТОН, 1 апрель. (ТАСС). Трумэн Австрияға, Францияға һәм Италияға «ваҡытлы ярҙам» тип атала торған ярҙам күрһәтеү өсөн 55 миллион доллар ассигнование биреү тураһындағы закон проектына ҡул ҡуйҙы.

Италия фашистәренең һәм „христиандар демократтарының" террористик хәрәкәттәре

РИМ, 31 март. (ТАСС). «Унита» газетаһы түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: 29 мартта Лодигә (Милан провинцияһы) яҡын урындағы Сомальяла атаҡлы фашист, урындағы промышленник Тоникелли, урамда коммунистар төркөмө менән бәхәсләшә башлап, шул урында уҡ 20 йәшлек коммунист Пьетро Бускиҙе атып үлтергән һәм Цампрони тигән икенсе коммунисте бик ныҡ яралаған, ул госпиталдә үлгән. Ыңғырҙыҡтарса үс алыуҙың өсөнсө ҡорбаны коммунист Певиани хәҙер госпиталдә үлем алдында ята. Урындағы «христиандар демократтары» менән тығыҙ бәйләнештә тороусы үлтереүсе хәҙер ҡулға алынған. Протест демонстрацияларын булдырмау өсөн Миландан Сомальяға шунда уҡ полиция килгән.

Шул уҡ ҡанда күршеләге эшселәр поселкаһы Кодоньола «христиандар демократтары» төркөмө халыҡ демократик фронты митингыһында ҡатнашыусыларға һөжүм иткән. Был митингыла секретарь Винт Санти сығыш яһаған. Бәрелешеүҙәр һөҙөмтәһендә митингыла ҡатнашыусы бер кеше яраланған.

29 мартта Туринда завод ойошмалары тарафынан ойошторолған халыҡ гуляниеһе барған общественный баҡсала «социаль хәрәкәт» тип атала торған фашистик ойошма террористәре тарафынан ташланған тиҙ ярылмай торған снаряд табылған.

Америка реакционерҙәренең Италиялағы һайлауҙарға тығылыуҙары

НЬЮ-ЙОРК, 1 апрель. (ТАСС). Италияла үткәреләсәк һайлауҙарға тәьҫир итеү маҡсатын тотоусы оятһыҙ рәүештә ҡурҡытыуҙар һәм вәғәҙә итеүҙәр кампанияһы АҠШ-та әлегә тиклем көсһәҙләнмәй. Италия өсөн «Америка тауышы» тигән радиотапшырыуҙа 30 мартта сығыш яһап, Американың хеҙмәт федерацияһы председателе Грин, әгәр ҙә Италияла һайлауҙар ваҡытында демократик көстәр еңә ҡалһалар, «Маршалл планы» буйынса ярҙам аласаҡ илдәр һанынан Италия сығарыласаҡ, тип Маршаллдың ҡурҡытыу менән һөйләгән сығышын яҡлаған.

«Италия демократияһы өсөн көрәш комитеты» тип атала торған комитеттең эше активлаша. Был комитет Италияла тыуған американлыларҙың халыҡ фронтына ҡаршы тауыш бирергә саҡырып Италияға хаттар яҙыуҙары өсөн агитация үткәрә.

Румыниялағы һайлауҙарҙа халыҡ демократияһы фронтының еңеүе

БУХАРЕСТ, 31 март. (ТАСС). Юстиция министерствоһы тарафынан алынған тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Бөйөк Халыҡ Собраниеһының 414 мандатының 405 мандатын халыҡ демократияһы фронты кандидаттары алған; 7 мандатты милли-либераль партия, ә 2 мандатты крәҫтиән-демократик партия алған.

Илдең бөтә өйәҙҙәренең тип әйтерлек һайлаусылары тулыһынса халыҡ демократияһы фронты тарафынан күрһәтелгән халыҡ демократик фронты кандидаттарының тулы составы өсөн тауыш биргәндәр.

Газеталарҙың хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, бөтә илдә — ҡалаларҙа, ауылдарҙа һәм предприятиеләрҙә Бөйөк Халыҡ Собраниеһына һайлауҙарҙа халыҡ демократияһы фронтының еңеүенә арналған халыҡ байрамдары үтә.

Иминселек Советенең яңы члендәр ҡабул итеү буйынса комиссияһында

НЬЮ-ЙОРК, 31 март. (ТАСС). Иминселек Советенең яңы члендәр ҡабул итеү буйынса комиссияһының күпселек члендәре, атап әйткәндә, Советтар Союзы, Совет Украинаһы, Ҡушма Штаттар, Англия, Сирия, Канада, Бельгия һәм Ҡытай вәкилдәре Берләшкән милләттәр ойошмаһына членлеккә ҡабул итеү тураһында Бирманың үтенесен яҡланылар. Аргентина һәм Франция вәкилдәре быға ҡаршы килмәкеләр, ләкин әлегә тиклем үҙҙәренең хөкүмәттәренән инструкциялар көтәләр әле. Колумбия вәкиле ултырышта ҡатнашманы.

Урындағы ашламаларҙы киң ҡулланырға

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы урожайҙы күтәреү өсөн урындағы ашламаларҙы күбәрәк туплау, әҙерләү һәм ҡулланыу партия, совет һәм ауыл хужалығы органдарының иғтибарын туплау тип билдәләне. Был күрһәтмә нигеҙендә БАССР Министрҙар Советы 1947 — 1948 йылдарҙа республика колхоздарында 2 миллион тонна тирәҫ, 50 мең тонна көл, 5 мең тонна ҡош тиҙәге, 150 мең тонна торф, 16 мең тонна компост әҙерләүгә һәм файҙаланыуға өлгәшергә, тип ҡарар ҡабул итте.

Был планды үтәү урожайҙы күтәреүҙә быйыл уҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирергә тейеш. Урындағы ашламаларҙы киң ҡулланған хужалыҡтар инде үткән йылдарҙа уҡ яҡшы уңыштарға өлгәштеләр. Краснокама районы «Октябрь» колхозы һәр ерҙең гектарына 20-шәр тонна яҡа башлаған тирәҫ индергән участканың һәр гектарынан 20,5 центнер, ә ашламаған урындан 10,2-әр центнер урожай алды. Көлдең һәм ҡош тиҙәгенең дә урожайға йоғонтоһо бик ҙур. «Красный Нагай» колхозы (Краснокама районы) бойҙай ерҙә 10 тонна тирәҫ, 6 центнер көл индереп, һәр гектарҙан 30-ар центнер урожай алыуға өлгәште. Байҡыбаш районы «Ҡыҙыл таң» колхозы яҙғы бойҙайҙың һәр гектарын 2-шәр центнер ҡош тиҙәге менән өҫтәмә аҙыҡландырып, гектарҙан 16-шар центнер, ә аҙыҡландырылмаған участканан 7-шәр центнер урожай алды. Бындай миҫалдар бик күп, улар бөтәһе лә урожайлылыҡты күтәреүгә урындағы ашламаларҙың бик ҙур йоғонто яһауҙары тураһында һөйләйҙәр.

Шуға ҡарамаҫтан, беҙҙең республика колхоздарында ла урындағы ашламаларҙы туплау һәм баҫыуҙарға сығарыу эше ҡәнәғәтләнерлек түгел. Баҫыуға тирәҫ сығарыуҙың йыллыҡ планы ни бары 70 процентҡа ғына үтәлгән. Ә көл йыйнау менән эш тағы ла насарыраҡ. Пландың өстән бер өлөшөнән генә үтәлеүе быны асыҡ күрһәтә. Ҡош тиҙәге әҙерләү менән дә эш шулай уҡ сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәрлек. Пландың үтәлеше ни бары 35,6 процент. Тик 1.394 тонна торф һәм 1.262 тонна компост — фекалий массаһы әҙерләнгән.

Баҫыуҙарға тирәҫ сығарыу айырыуса Архангель, Кейергәҙе, Мәләүез, Йомаҡай, Федоровка, Йылайыр һәм Күгәрсен райондарында насар бара. Улар был мөһим эш буйынса планды 19—47 процентҡа ғына үтәгәндәр.

Абзан, Белоҡатай, Ғафури, Мишкә, Ола-Тилаҡ райондарында көл йыйнау эшенә бөтөнләй иғтибар бирелмәй. Был райондарҙың колхоздары, башлыса, был эште бөтөнләй башламағандар тиерлек. Бишбүләк, Ҡандра, Покровка һәм башҡа райондарҙа ҡош тиҙәге йыйнау менән дә шундай уҡ хәл.

Торф әҙерләү буйынса ла күп эштәр башҡарырға кәрәк. Ҡайһы бер урындарҙа ашламаларҙың был төрө бөтөнләй баһаланмай һәм уны әҙерләү буйынса саралар күрелмәй. Кушнаренко, Бүздәк һәм ҡайһы бер башҡа райондарҙа ашлама бер торф сығарыу эшенә әле тотонмағандар ҙа.

Был фактылар бөтәһе лә урожайҙы күтәреү өсөн көрәштә урындағы ашламаларҙың күп кенә участкаларҙа серьез иғтибар бирелмәүен күрһәтәләр. Ашламаларҙы әҙерләүгә иң уңайлы ваҡыт — ҡыш тулыһынса файҙаланылманы. [illegible] ашламалар туплау планын үтәү генә түгел, [illegible] тейеш ине. Ләкин был эшләнмәне. Етмәһә, хәҙер ҙә ашламалар туплауға күп урындарҙа формаль ҡараш йәшәй.

Урындағы ашламалар әҙерләү өҫтөнән контролдең булмауы ҡайһы бер работниктарға алдашыу юлына баҫырға мөмкинлек бирҙе. Дыуан районының «Урал» колхозы председателе Рәхмәтов район ауыл хужалығы бүлегенә баҫыуға тирәҫ сығарыу планы 69 процентҡа үтәлде, тип мәғлүмәт бирә, ә ғәмәлдә план 33 процентҡа ғына үтәлгән. Шул уҡ районның «Красное поле» колхозы председателе Хлопин да алдашыу юлына баҫа. Ул быуа быуыу өсөн сығарған тирәҫте лә баҫыуға сығарылды, тип иҫәпләй. Был райондың «Колос», «Коминтерн», Буденный исемендәге колхоздарында тирәҫ фермаларҙың колхозсыларҙың баҡсаларына сығарыла, ә колхоз баҫыуҙары ашламаһыҙ ҡалдырыла. Ләкин был фактыларҙың береһенә лә район ауыл хужалығы бүлеге иғтибар итмәй, уның работниктәре агротехник саралар алып барылмай.

Урындағы ашламаларҙы туплауҙы һәм ҡулланыуҙы ойоштороуға бигерәк тә агрономдарҙың ҙур булышлыҡ итеүҙәре тейеш. Ләкин күп кенә агрономдар үҙҙәренең был ваҙифаларын үтәүҙән алыҫ торалар әле.

Республикабыҙ урындағы ашламаларға бай, ресурстар ҙур. Улар урожайҙы күтәреүҙә ҙур өлөш индерергә тейеш. Хәҙер, сана юлы бөткәнгә тиклем, һәр бер колхоздың баҫыуҙарға тирәҫ сығарыу планын үтәүгә өлгәшергә кәрәк. Шулай уҡ көл, ҡош тиҙәге йыйнау, тирәҫ шыйыҡсаһы әҙерләү планы ла ошо көндәрҙә тулыһынса үтәлергә тейеш.

Хәҙер ужымдарҙы тәрбиәләү буйынса иң яуаплы осор — өҫтәмә аҙыҡландырыу, тырматыу ваҡыты килеп етә. Колхоз, МТС, район ауыл хужалығы бүлеге агрономдары был бик мөһим сараны үткәреү эшенә серьез етәкселек итергә, ашламалар индереү күләмен билдәләүҙә, уларҙы дөрөҫ ҡулланыуҙа колхоздарға ярҙам итергә, эштең сифаты өҫтөнән ныҡлы контроль урынлаштырырға тейештәр.

Ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу, ашламаларҙы киң ҡулланыу — юғары урожай өсөн көрәштә көслө ҡорал. Урындағы ашламаларҙы тулы файҙаланыу бик күп өҫтәмә урожай бирәсәк. Шулай булғас, һәр бер колхоз, һис һүҙһеҙ, ашламалар әҙерләү планын тулыһынса үтәргә бурыслы.

А. Веретенников,
С. Еникеев.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА



Йәш техниктарҙың республикан станцияһының авиоконструкторҙар лабораторияһында.

Һүрәттә: Еремин Донат (алғы планда) бензин менән хәрәкәтләнеп осоп торған самолет моделе эргәһендә. Уға әле 15 кенә йәш, ә ул авиомоделистарҙың Бөтә Союз ярышында ике тапҡыр ҡатнашты.

В. Жданов фотоһы.

Бөрөлә Горький көндәре

Бөрө ҡалаһы хеҙмәтсәндәре бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горькийҙың тыуыуына 80 йыл тулыуҙы киң рәүештә билдәләп үттеләр. Ҡала театры бинаһында Горькийҙе иҫкә алыуға арналған кисә үткәрелде. Кисәлә беренсе номерле урта мәктәптең әҙәбиәт уҡытыусыһы иптәш Чернова Горькийҙең ижади юлы тураһында доклад менән сығыш яһаны. Өлкән класс уҡытыусылары һәм уҡыусылары бөйөк яҙыусының әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡынылар.

Район культура йортонда урындағы драм түңәрәк коллективы көсө менән Горькийҙең «Аҡтыҡсылар» пьесаһы, уҡытыусылар йорто клубында «Тормош төпкөлөндә» тигән спектакль ҡуйылды.

Почет кнәгәһе

Өфө яҙыу машиналары заводында почет кнәгәһе булдырылған. Был кнәгәгә цех коллективенең ҡарары буйынса биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүҙә алынған социалистик йөкләмәләрен намыҫ менән үтәүсе заводтың иң яҡшы эшселәренең, инженер-техник работниктарының һәм хеҙмәткәрҙәренең исемдәре индерелә.

Почет кнәгәһенә индерелгән алдынғы эшселәр араһында слесарҙарҙан Мөхәмәтьянов, Осипов, Урьянов, лекальщик Носонов, термист Деревянов иптәштәрҙең исемдәре бар.

Ватан һуғышында һәләк булыусылар семьяларына һәм инвалидтәргә практик ярҙам

Партия һәм хөкүмәтебеҙ Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булыусылар семьялары һәм инвалидтар тураһында атайҙарса хәстәрлек күрәләр. Ватан һуғышында һәләк булыусылар семьяларына һәм инвалидтәргә 1947 йылда тик Асҡын районы буйынса ғына 3.898.747 һум пенсия һәм пособия бирелгән.

Үҙған йылда 203 хужалыҡҡа яңы йорт һалынған, 722 йортҡа капиталь ремонт үткәрелгән. 112 семьяға 617 центнер картуф бирелгән, шулай уҡ 2518 йөк утын һәм 4000 йөк бесән килтерелгән.

Районда ата-әсәһеҙ ҡалған балалар өсөн 2 балалар йорто ойошторолдо, бында хәҙер 194 бала тәрбиәләнә.

Совхозда радиоузел

«Союзтехрадионың» Башҡортостан бүлеге күптән түгел Баймаҡ районы Һуәнәк иткелек-һөтсөлөк совхозында ҡеүәтле радиоузел төҙөнө. Ул 2000 радиоточканы хеҙмәтләндерә. Хәҙер совхоздың һәр бер эшсеһе өйөндә һәм общественный биналарында репродукторҙар ҡуйылған.

Парткабинет библиотекаһы

Черниковск машиналар төҙөү заводы парткабинетенең библиотекаһы ҡалала иң ҙур библиотекаларҙан һанала. Уның 6000-дән артыҡ китабы бар һәм шулай уҡ төрлө газета-журналдарға ла бай.

Библиотеканың актив уҡыусылары һаны йылдан-йыл үҫә бара. Хәҙерге көндә ул 5169 кешегә хеҙмәтләндерә.

Ауылда культура-ағартыу эштәре

Беҙҙең Сталин исемендәге колхозда драма түңәрәге колхозсылар өсөн күп кенә постановкалар ҡуйҙы. Клуб мөдире иптәш М. Мөфлихунов түңәрәк менән яҡындан тороп етәкселек итә.

Уҡыу өйөндә әҙәби китаптар күп, газета, журналдар регуляр килә. Ауылыбыҙҙың ете йыллыҡ мәктәп уҡытыусылары колхозсылар өсөн беседалар, докладтар яһайҙар, лекциялар уҡыйҙар. Уҡытыусы К. Ҡамалов иптәштең «Коммунизмға барлыҡҡа килеүе» тигән темаға күптән түгел һөйләгән лекцияһы колхозсыларҙы бик ҡыҙыҡһындырҙы.

М. Рахманғулов.
Дыуан районы.

Яңы магазин

ОКТЯБРЬСК. Нарыш эшселәр поселкаһында «Туймазынефть» тресы ОРС-ы тарафынан яңы төҙөлгән ҙур магазин асылды. Магазин яҡшы йыһазландырылған. Ул Нарыш участкаһында эшләүсе һәм йәшәүсе быраулау эшселәрен, промыселдарҙың һәм башҡа предприятиеләрҙең эшселәрен хеҙмәтләндерә.

Яуаплы редактор урынбаҫары
З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт академия драма театрында — Премьера — «ХАЖИ ӘФӘНДЕ ӨЙЛӘНӘ». Комедия. Шәриф Ҡамал әҫәре. Киске 8 сәғәттә башлана.

Рус драма театрында — «ТАРТЮФ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Башгосфилармонияла — Эстрада артистәре беренсе Бөтә Союз конкурсы лауреаттары Валентина СЕРГЕЕВА, Александр ТАСКИН ҡатнашлығында эстрада таңцалары кисәһе. Киске 9 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — «ДИҢГЕҘҘӘГЕЛӘР ӨСӘН».

«Салауатта» — «ЗӘҢГӘР ЮЛДАР».

Матросов исемендәге кинола — «КОНЕК-ГОРБУНОК».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-70-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-85-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26

П 00713. Өфө газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советс һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советс органы.

29-сы йыл сыға

№ 68

1948 йыл

4 апрель

йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин

Хөкүмәтебеҙ республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларының хеҙмәттәрен юғары баһаланы.

Был хөрмәткә яуап итеп юғары урожай өсөн көрәште тағы ла киңерәк йәйелдерәйек!

Республикабыҙҙың юғары урожай мастерҙарына дан!

Газетабыҙҙың бөгөнгө номерендә ҙур шатлыҡлы хәбәр — Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителә. Хөкүмәтебеҙ социалистик баҫыу батырҙарының хеҙмәттәрен юғары баһаланы. Ауыл хужалығы алдынғыларынан 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

Был бик ҙур почетлы һәм хөрмәтте юғары урожай мастерҙаре ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәштә яулап алдылар. Социалистик ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең боевой программаһы булған тарихи ҡарар республикабыҙҙың бөтә игенселәре тарафынан ҡайнар рәүештә ҡаршыланды. Һуғыштан һуң кисектергеһеҙ бурыс булып яңынан көн тәртибенә килеп баҫҡан иген проблемаһын хәл итеү өсөн көрәштә совет крәҫтиәндәренә уларҙың Тыуған илгә булған сикһеҙ мөхәббәттәре, государствоға мөмкин тиклем күберәк иген һәм башҡа ауыл хужалығы продукттары биреү теләге етәкселек итте. Изге теләк, йыл буйынса йәлләмәйенсә һалынған батыр хеҙмәт һоҡландырғыс еңеүҙәргә килтерҙеләр.

Юғары урожай мастерҙаренең күрһәткестәре һәр кемде шатландырырлыҡ. Улар бөртөклө ашлыҡ культураларының мул урожайын үҫтерҙеләр. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Стоянов бригадаһы 28,1 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 31,86-шар центнер урожай алды. Шулай уҡ Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алған Банат Батырова 2 гектар майҙандың һәр гектарында 611,5 центнер шәкәр сөгөлдөрө үҫтереп, юғары урожай өсөн көрәштә гүзәл өлгө күрһәтте. Социалистик баҫыу стахановсылары колхоз баҫыуҙарында арыу-талыуҙы белмәй эшләнеләр, алдынғы совет агрономия фәненең өлгәшеүҙәрен производствола киң ҡулланылар, агротехника талаптарын еренә еткереп үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрҙеләр.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы машина-трактор станциялары алдына яуаплы бурыстар ҡуйҙы. Социалистик баҫыуҙарҙың урожайлылығын күтәреү — МТС-тарҙың төп бурысы, тип билдәләнә. Республикабыҙҙың механизаторҙары был өлкәлә ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Ҡайҙа машина-трактор паркының эшләп сығарыуын күтәреү менән бер рәттән, баҫыу эштәренең сифатына серьез иғтибар бирелде, — унда урожай ҙа юғары булды. Дәүләкән һәм Базан машина-трактор станцияларының эштәре тап шул турала һөйләйҙәр. Был МТС-тар үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа юғары урожай алыуҙы тәьмин иттеләр. Бына шуның өсөн дә хөкүмәтебеҙ уларҙың хеҙмәтен юғары баһаланы, трактор бригадалары бригадирҙәре Алехин, Рябов, МТС етәкселәренән Павлов, Нестеров, Ломодуров, Титов иптәштәргә иң почетлы исемде — Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе.

Республикабыҙ ауыл хужалығы алдынғыларының почетлы исемлеге быныц менән генә тамамланмай. Унда Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алған Абрамичева, Стоянов, Тарасенко иптәштәр бар. Улар — республикабыҙҙың ғорурлығы. Улар — социалистик ауыл хужалығын үҫтереү өсөн көрәштең алдынғылары. Уларға — дан!

Күрһәтелгән хөрмәт, почетлы наградалар үткәндәге хеҙмәтте билдәләү менән, шул уҡ ваҡытта артабан да яҡшы эшләүҙе талап итә. Өлгәшелгәндәр менән тынысланырға һис урын юҡ. Киләсәктә тағы ла юғарыраҡ урожай үҫтереү, барлыҡ колхоздарҙы алдынғылар сафына сығарыу өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Уларҙы һәр бер хужалыҡта тулы файҙаланыу өсөн көрәш йәйелдерергә кәрәк.

Социалистик ауыл хужалығыбыҙ ҡеүәтле рәүештә алға бара. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан ауыл хужалығын күтәреү буйынса күрелгән саралар колхоз крәҫтиәндәрен яңынан-яңы батырлыҡтарға дәртләндерә. Алтай игенселәре быйыл да бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатында үҙ өҫтәренә йөкләмәләр алып, илебеҙҙең бөтә колхозсыларын, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарын, механизаторҙарын, ауыл хужалығы специалистарын юғары урожай алыу һәм малсылыҡты үҫтереү өсөн социалистик ярышҡа саҡырып мөрәжәғәт иттеләр. Уларҙың патриотик саҡырыуы бөтә Тыуған илебеҙҙә ҡайнар отклик тапты. Беҙҙең Башҡортостан игенселәре лә ярыш инициаторҙарының мөрәжәғәтенә конкрет йөкләмәләр алыу һәм уларҙы үтәүҙә тырыш хеҙмәт менән яуап бирәләр. Бурыс — ауылдағы патриотик күтәренеште тағы ла көсәйтеүҙән, хөкүмәтебеҙҙең республикабыҙ ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм ордендәр, медалдәр менән наградлау тураһындағы Указына яуап итеп, 1948 йылда яңы еңеүҙәр өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереүҙән тора.

Хәҙер колхоз ауылында бөтә иғтибар яҙғы баҫыу эштәренә һәр яҡлап яҡшы әҙерләнеүгә юнәлтелгән булырға тейеш. Был өлкәлә эшләнмәгән эштәр бик күп әле. Күп кенә райондар, колхоздар етерлек тиклем сәсеү орлоғо менән тәьмин ителмәгәндәр. Государство тарафынан бирелгән сәсеү планын орлокһоҙ үтәп булмаясаҡ. Быны иҫтә тотоп, ҡалған ваҡыттың бер генә сәғәтен дә бушҡа уҙғармайынса, урындағы мөмкинлектәрҙе файҙаланырға һәм сәсеү орлоғо фондын тулыландырыу өсөн ашығыс саралар күрергә кәрәк. Күп кенә МТС-тарҙа тракторҙарҙы һәм колхоздарҙа ауыл хужалығы инвентарҙарен ремонтлау эштәре әле булһа иҫ киткес аҡрын бара. Яҙғы баҫыу эштәре өсөн ягыулыҡ ташыу бөтә урындарҙа ла талап ителгәнсә ойошторолмаған. Күп кенә колхоздарҙа производство пландарын төҙөү, хеҙмәтте ойоштороу мәсьәләләре менән бөтөнләй насар шөғөлләнәләр. Былар—шулай уҡ һис кисекмәҫтән бөтөрөүҙе талап иткән ҙур етешһеҙлектәр. Партия, совет ойошмалары уларҙы бөтөрөү өсөн тиҙерәк саралар күрергә һәм яҙғы сәсеүгә өлгөлө әҙерлекте тәьмин итергә тейештәр.

Ауыл хужалығы алдынғылары юғары урожай өсөн көрәштә республикабыҙҙың бөтә игенселәренә өлгө күрһәтәләр. Уларҙың хеҙмәттәре достойн рәүештә билдәләнде. Был награда республикабыҙҙың бөтә игенселәрен хеҙмәт батырлыҡтарына тағы ла көслөрәк дәртләндерһен, 1948 йылда юғары урожай алыу өсөн көрәш тағы ла киңерәк йәйелдерелһен!

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында

СССР Верховный Советы Президиумының

УКАЗЫ

СССР Верховный Советы Президиумының 1947 йыл 29 март Указына ярашлы рәүештә, 1947 йылда колхоз мәжбүри поставкаларҙы һәм МТС эше өсөн натуралата түләүҙәрҙе үтәгән һәм 1948 йылғы яҙғы сәсеү өсөн бөртөклө ашлыҡ культуралары орлоҡтары менән тәьмин ителгән хәлендә, бойҙайҙан, **арыштан, шәкәр сөгөлдөрөнән** юғары урожай алғандары өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирергә, Ленин ордене һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медале тапшырырға:

1. **Нина Ивановна Абрамичеваға** — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы звеноводы. Ул 8 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 30-ар центнер арыш урожайы алды.

2. **Тихон Егорович Алехинга** — Дәүләкән МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры. Ул 150 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,4-әр центнер арыш урожайы алды.

3. **Банат Хәйрулла ҡыҙы Батыроваға** — Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы звеноводы. Ул 2 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 611,5-шәр центнер шәкәр сөгөлдөрө алды.

4. **Николай Зиновьевич Ломодуровҡа** — Базан МТС-ының өлкән механигы. Ул МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алды.

5. **Ғиниәт Ғәлиәкбәр улы Насировҡа** — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоз звеноводы. Ул 11 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алды.

6. **Дмитрий Леонтьевич Нестеровҡа** — Дәүләкән МТС-ының өлкән агрономы. Ул МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алды.

7. **Федор Максимович Павловҡа** — Дәүләкән МТС-ы директоры. Ул МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алды.

8. **Федор Андреевич Рябовҡа** — Базан МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры. Ул үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 183 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 22,07-шәр центнер арыш урожайы алды.

9. **Александр Васильевич Стояновҡа** — Дәүләкән районы «1 Мая» колхозы бригадиры. Ул 28,1 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы алды.

10. **Николай Евдокимович Тарасенкоға** — Дәүләкән МТС-ының өлкән механигы. Ул МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алды.

11. **Борис Иванович Титовҡа** — Базан МТС-ының өлкән агрономы. Ул МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алды.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль
2 апрель 1948 йыл.

Указ яңы еңеүҙәргә рухландыра

БАЙМАҠ. (Телефон аша). Радио Карл Маркс исемендәге колхозға ҙур шатлыҡлы хәбәр килтерҙе. Колхоздың данлы звеноводы Ғиниәт Насировҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы хәбәр бик тиҙ арала бөтә ауылға таралды.

Йәштәрҙән алып, ҡарттарға тиклем үҙҙәренең шатлыҡтарын уртаҡлашыу өсөн иртүк клубҡа ашыҡтылар. Улар араһында колхоз баҫыуҙарында арыу-талыуҙы белмәйенсә Ғиниәт Насиров менән бер звенола эшләгән Фәтхулла Утарбаев, Фәтхислам Үҙәнбаев, Фатима Азаматова һәм башҡалар ҙа бар. Уларҙың йөҙҙәре шат. Бөтә кеше был хеҙмәт батырҙарына хөрмәт менән ҡарай һәм звеновод Насиров менән бергә уларҙы ла ҡотлайҙар.

— Һеҙ еңеүҙе бергә яулап алдығыҙ, рәхмәт һеҙгә, — тиҙәр колхозсылар.

Көслө алҡыштар аҫтында трибунаға йәш кенә егет—Ғиниәт Насиров күтәрелә. Ул колхозсыларға үҙенең звено члендәре менән нисек итеп юғары урожай алыуы тураһында һөйләй.

— Беҙҙең колхозда бөтә звеноларҙа ла юғары урожай үҫтереп алырға мөмкин. Быйыл өсөн күп хеҙмәт һалыу талап ителә. Беҙ быйыл үҙебеҙҙең звеноға беркетелгән 10 гектар бойҙайҙың һәр бер гектарынан кәмендә 200-әр бот, ә 10 гектар арыштың һәр бер гектарынан 202-шәр бот урожай алырға һүҙ бирен, бөтә колхозсыларҙы социалистик ярышҡа саҡырабыҙ, — ти.

Карл Маркс исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре хөкүмәттең ҙур наградаһына, сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары сифатлы итеп үткәреү һәм быйыл колхоз баҫыуҙарында тағы ла юғарыраҡ урожай алыу менән яуап бирергә ҡарар иттеләр.

Ғариф Ғүмәр

Ике герой

Сәскә атҡан
    июнь көнөндә
Ерҙе япҡан йәшел игендәр
Үҫкән саҡта йомшаҡ елберҙәй
Дошман керҙе Совет еренә,
Тоғро булып Тыуған иленә,
Шинель һалып батыр инемә
Мин киткәндә һуғыш еренә,
Оҙатып һин әйттең: «Еңелмә!»
Тағы ла бар ине һүҙҙәрең,
Ләкин күңелең һинең түҙмәне.
Томанланды ҡара күҙҙәрең,
Әйтеп бөтә алманың һүҙҙәрең...
Ташып килгән бик күп уйымды
Әйтә алманы минең телем дә,
Һәм әйттем мин һиңә шул ваҡыт:
— Ышан миңә! Мин һис еңелмәм!

* * *

Әйтеп бөтөрмәгән һүҙҙәрең
Минең янға барып торҙолар,
Һуғыш уттарынан көслөрәк
Балҡыныулар, яныр торҙолар.
Өшөгәндә һалҡын буранда —
Улар иҫте ҡайнар тын булып,
Йылы итек, йылы тун булып,
Асыҡҡанда икмәк — он булып,
Һәр бөртөгө һинең игендең
Яҡлаусыһы булды илемдең
Һәм беҙ һүҙҙе әйтеп бөтөрҙөк:
Дошманды эир-зәбәр килтерҙек.

* * *

Сәскә атҡан
    июнь көнөндә
Тулҡынланды һинең гектарҙар.
Көҙ килгәндә
    тауҙай өйөлдө
Һин үҫтергән ашлыҡ тоҡтарҙа...
Осраттым мин һине тағы ла
Министрҙар йорто залында,
Келәс ине ҡара күҙҙәрең
Һәм күп ине бутай һүҙҙәрең.
Күкрәгемә күҙең төштө лә,
Әйтә алманың әйтер һүҙеңде,
Мин дә ҡарай һинең түшеңә.
Ярты юлда һүҙем өҙөлдө.
Солғағайны һине һәм мине
«Ураҡ-сүкеш» һәм «Йондоҙ» нуры.
Беҙҙең уйҙар нурға төрөнөп
Яңғыраны һүҙһеҙ йыр булып.

1948 март.

Базан МТС-ында

БӨРӨ. (Телефон аша). Базан МТС-ы механизаторҙары Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы сығыу айҡанлы ҙур митинг үткәрҙеләр. Унда ҡатнашыусылар илебеҙҙең игенселәре, механизаторҙары тураһында көндәлек хәстәрлек күреүе өсөн партиябыҙға һәм хөкүмәтебеҙгә, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға рәхмәт белдерҙеләр һәм МТС-тағы ес геройҙы ғорурлыҡ менән ҡотланылар.

МТС-тың өлкән агрономы, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Б. И. Титов митингыда сығыш яһап, үҙенең тәүге һүҙҙәрен коммунистар партияһына, Совет Хөкүмәтенә һәм иптәш Сталинға рәхмәт белдереү менән башланы.

— МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа быйыл мин тағы ла юғарыраҡ урожай үҫтереү өсөн бөтә көсөм менән эшләрмен, — тине ул.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Н. З. Ломодуров һәм Ф. А. Рябов иптәштәр ҙә митингта сығыш яһап, быйыл тағы ла яҡшыраҡ эшләргә һүҙ бирҙеләр. Указға яуап итеп, МТС механизаторҙары 1948 йылда 15 ат көслө һәр тракторға кәмендә 700-әр гектар ер эшкәртергә, МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа һәр гектарҙа уртаса 15-шәр центнер урожай үҫтерергә йөкләмә алдылар.

Һүрәттә: (һулдан уңға) — өҫкө рәттә: 1. Банат Хәйрулла ҡыҙы Батырова — Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы звеноводы; 2. Дмитрий Леонтьевич Нестеров — Дәүләкән МТС-ының өлкән агрономы; 3. Николай Зиновьевич Ломодуров — Базан МТС-ының өлкән механигы; 4. Федор Максимович Павлов — Дәүләкән МТС-ы директоры. Аҫҡы рәттә: 1. Тихон Егорович Алехин — Дәүләкән МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры; 2. Александр Васильевич Стоянов—Дәүләкән районы «1 Мая» колхозы бригадиры; 3. Федор Андреевич Рябов — Базан МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры; 4. Ғиниәт Ғәлиәкбәр улы Насиров — Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоз звеноводы.

Совет төҙөлөшө

Ауыл Совете председателе Йомабикә Әүәлбаева

Ишмырҙа ауыл Совете территориаль яҡтан районның промышленность объекттарын да, шулай уҡ ауыл хужалығын да эсенә ала. Был хәл ауыл Совете башҡарма комитетына етәкселек эшен еңел уҡ түгел. Шуға ҡарамаҫтан, Ишмырҙа ауыл Совете үҙ районында ғына түгел, бәлки республикала алдынғы ауыл Советтарының береһе булып тора.

— Беҙҙең районда, — ти Баймаҡ район Совете башҡарма комитете председателе иптәш Әптелғәни Рафиков, — иптәш Ракаев председатель булып эшләгән Түбә поселка Совете һәм иптәш Хәлитов председатель булып эшләгән Татлыбай ауыл Совете алдынғы Советтар булып һаналалар. Ә иптәш Әүәлбаева председатель булған Ишмырҙа ауыл Совете алдынғы Советтарҙың ҙа алдынғыһы ул.

Йомабикә Әүәлбаева иптәшкә хәҙер 57 йәш. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ул энергиялы һәм эшлекле кеше. Ул Темәс, Түбә һәм Мулдаҡай ауыл Советтары менән етәкселек иткән. Ә был Ишмырҙа ауыл Советында инде өсөнсө тапҡыр председатель булып һайланған. Ғөмүмән, ул совет аппаратында етәкселек эшендә 19 йыл эшләй.

— Йомабикә—башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының типик вәкиле ул. Йәштән йәтим ҡалып, ул күп йылдар батраклыҡта йөрөгән. Совет власының тәүге йылдарында делегаткалар хәрәкәтендә, ярлылар комитетында актив ҡатнашлыҡ иткән. Ә Темәс ауыл Совете канцелярияһында уборщица булып эшләгән көндәрҙән алып инде совет төҙөлөшө эшенә яҡынлаша башлай. Ул үҙ алдына уҡырға тотона, ауыл уҡытыусылары ла уға ярҙамға килаләр һәм ул грамотаны үҙләштерә, актив совет работнигенә әйләнә, партия сафына инә. Хәҙер ул Баймаҡ район Совете депутаты, ВКП(б)-ның район комитеты пленумы члене.

Бай тәжрибәле Йомабикә Әүәлбаева 15 йыл өҙлөкһөҙ етәкселек иткән Ишмырҙа ауыл Совете икенсе йыл инде БАССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулында тота.

— Был байраҡ, — ти иптәш Әүәлбаева, — беҙҙең ауыл Совете депутаттарының тырыш хеҙмәттәре һөҙөмтәһендә яулап алынды.

Был ауыл Советында 19 депутат. Фрунзе исемендәге колхоздың председателе Сөләймән Игишев, МТФ мөдире Миңһаж Баянов, баҫыусылыҡ эше стахановкаһы Ғәлимә Сапарова, шофер Билал Йәнбирҙин, «Красная дружина» колхозы председателе Никита Тимофеев, Багачевка ауылының ете йыллыҡ мәктәбе директоры Таранов, уҡытыусы Екатерина Щекачева, йылҡысылыҡ заводы эшсеһе Зәһира Сафина, йылҡысылыҡ совхозы эшсеһе Нурислам Фәйзуллин, Байҡара прискаһының Баҡыр-тау артеле старателдәре Вәли Сәмерханов, Петр Ләмзин, Байҡара почта бүлеге мөдире Зина Демушева, Байҡара медпункты мөдире Фәйрүзә Абдрахманова иптәштәр депутатлыҡ вазифаһын өлгәлә үтәйҙәр. Ауыл Советы эргәһендә бюджет, ауыл хужалығы, юл төҙөлөшө, сауҙа, һаулыҡ һаҡлау, культура-ағартыу буйынса төҙөлгән даими комиссиялар систематик рәүештә, планлы эш алып баралар. Культура-ағартыу комиссияһы һуңғы көндәрҙәге ултырышында Багачевка ауылында өлкәндәрҙе уҡытыу мәсьәләһен ҡараны. Һөҙөмтәлә хәҙер унда был эш юлға һалынды. Ауыл Советында 4 йыл секретарь булып эшләгән Гәүһәр Ғүмәрова иптәш тә үҙ эшен һөйөп башҡара.

Депутаттарҙың намыҫлы хеҙмәттәре һөҙөмтәһендә бында хужалыҡ-политик кампаниялар уңышлы үтәлә. Бындағы ике колхоз һәм бер совхоз яҙғы сәсеүгә әҙерлекте теүәлләнеләр. Ә старателдәр быйыл да ай һайын планды арттырып үтәйҙәр.

Ф. Айбулатов.

Депутат эш өҫтөндә

Александра Николаевна Ясенева Баҡалы район үҙәгендәге амбулаторияла врач булып эшләй. Ул үҙ профессияһын яҡшы белеүе, халыҡты медицина яғынан хеҙмәтләндереүгә үҙенең бөтә белемен һәм энергияһын биреп эшләүе арҡаһында хеҙмәтсәндәр араһында ҙур авторитет менән файҙалана. Шуға күрә лә хеҙмәтсәндәр уны район Советына депутат итеп һайланылар.

Депутат — ул халыҡ хеҙмәтсеһе. Александра Николаевна быны яҡшы аңлай һәм был бөйөк бурысты үтәү өсөн ул ысын күңелдән тырышып эшләй. Район Советының беренсе сессияһы иптәш Ясеневаны район Советының һаулыҡ һаҡлау буйынса даими хәрәкәт итеүсе комиссияның председателе итеп һайланы. Шул көндән башлап Александра Николаевна районның һаулыҡ һаҡлау учреждениеләренең эштәрен яҡшыртыу өсөн практик эшкә тотондо.

Комиссия үҙенең эшен район Советы башҡарма комитеты тарафынан раҫланған план нигеҙендә алып бара. Комиссия члендарының һәр береһенә задание бирелде. Улар иң элек район үҙәгендәге медицина учреждениеләренең эштәрен тикшерҙеләр, тикшереү һөҙөмтәһендә асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә уларға практик ярҙам күрһәттеләр.

Район Советының һаулыҡ һаҡлау буйынса даими хәрәкәт итеүсе комиссияһының инициативаһы менән районда Яңы Ҡорос, Килкабыҙ ауыл Советтарында медицина пункттары асылды, районда ике урында бала тыуҙырыу йорто эшләй башланы. Хәҙер Ҡуштирәк ауылында больница ойоштороу өсөн әҙерлек алып барыла.

Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә комиссия тарафынан үткәрелгән был эштәрҙә комиссия члендары ғына түгел, ә уның тирәһенә тупланған актив тә яҡындан ҡатнашты. Район үҙәгендәге больницала, ауылдарҙағы медицина пункттарында эшләүсе врачтар, медицина работниктәре комиссияның эшендә актив ҡатнашалар. Хәҙер комиссия үҙенең активы ярҙамында яҙғы-йәйге ауыл хужалығы эштәре ваҡытында йәслләр, балалар баҡсалары асырға әҙерлек алып бара. Йәсле мөдирҙәре әҙерләү өсөн район үҙәгендә курс ойошторолоп, эшкә башланы.

Иптәш Ясенева медицина-санитария темалары буйынса доклад һәм лекциялар менән хеҙмәтсәндәр араһында йыш ҡына сығыш яһай. Уның: «Йәш балаларҙы ауырыуҙан нисек һаҡларға», «Трахома һәм уға ҡаршы көрәш», «Септик ангинаға ҡаршы көрәш саралары» тигән темаларға яһаған лекцияларын хеҙмәтсәндәр бик яратып тыңланылар.

Комиссия инициативаһы менән район больницаһы ҡаршында медицина работниктәренең квалификацияларын күтәреү буйынса 30 кешенән торған түңәрәк ойошторолдо. Ул түңәрәккә иптәш Ясенева үҙе етәкселек итә.

Х. Ғилманов,
Район Советы башҡарма комитеты секретаре.

Ауыл Советтәре председателдәре семинары

Ҡыйғы район Советы башҡарма комитеты ауыл Советтәре председателдәре һәм секретарҙәре өсөн бер аҙналыҡ семинар үткәреү.

Семинарҙа ҡатнашыусылар «Социалистик государство тураһында Ленин—Сталин учениеһе», «СССР-ҙың общественный һәм государство ҡоролошо», «СССР граждандарының хоҡуҡтары һәм бурыстары» тигән һәм башҡа темаларға докладтар һәм лекциялар тыңланылар. Лекция һәм докладтарҙы районның етәксе работниктәре уҡыны.

З. Вәлиев.

ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘӘ МАЙ АЛДЫ ЯРЫШЫ

Бөйөк байрамды производствоның яңы уңыштары менән билдәләйек!

Экономия өсөн көрәш инициаторҙары

8-се март исемендәге фабриканың комсомолецтәре Сталинград ҡалаһы «Красный Октябрь» заводы комсомолецтәренең өлгөһөндә яңы йыл башынан алып экономия өсөн ныҡышмалы көрәш йәйелдереп ебәрҙеләр. Комсомолецтәрҙең башланғысына бөтә эшсе ҡатын-ҡыҙҙар ҡушылды. Фабрикала махсус комиссия ойошторолоп, ул материалдарға, электр энергияһына экономия яһау, эш ваҡытын тығыҙлау мөмкинлектәрен асыҡлау өҫтөндә эшләй. Комиссияға ярҙам итеү өсөн 54 комсомолец-йәштәр бригадалары төҙөлдө. Улар оборудованиеларҙы һәм машиналарҙы дөрөҫ файҙаланыуҙы контроль алып баралар.

4-се цехты икегә бүлеп торған, арҡылы ҡуйылған таҡта эшкә ҡамасаулыҡ итә һәм көндөҙгө яҡтылыҡты үткәрмәй ине. Шуға күрә был цехта көндөҙ электр уты менән файҙаланырға тура килде. Комсомолка Дормидонтова, Савельева, Гагина иптәштәрҙең тәҡдимдәре буйынса был перегородка алынып ташланды. Хәҙер цехта иркен һәм яҡты. Көндөҙ электр уты ла талап ителмәй.

Комсомолецтәрҙән төҙөлгән контроль посттар материалдарҙың, электр энергияһының экономияланыуын ныҡ күҙәтеп баралар. Өсөнсө цехтағы оҙон агрегат һәр ваҡыт электр яҡтыһы менән яҡтыртылып торола һәм уға бик күп энергия тотола ине. Комсомолецтәр яҡтыртыу системаһын ентекле рәүештә өйрәнделәр. Улар бер машинанан башҡаларын көндөҙ электр яҡтыһы яҡтыртмайынса ла эшләтергә мөмкинлеген таптылар. Был тәҡдимде тормошҡа ашырыу цехта электр лампочкаларының һанын 20 данаға ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирҙе.

Кейем бесеү цехы эшселәре лә үҙ эштәрен үҙгәртеп ҡорҙолар. Улар туҡыманың һәр бер сантиметры өсөн көрәшәләр. Ошолар һөҙөмтәһендә беренсе кварталда фабрикала 3000 метр самаһы бөҫтау һәм 2000 метр самаһы мамыҡ туҡымаларына экономия яһалды.

Көндөҙгө ваҡытта электр яҡтыһын ҡыҫҡартыу арҡаһында 5 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһауға өлгәшелде.

А. Имангулов.

Стахановсы вахтала

Начальнигы инженер иптәш Наконечный булған төҙөлөш участкаһының беренсе площадка эшселәре агрегат заводы коллективы саҡырыуына ҡушылып, май алды социалистик ярышына сыҡты һәм стахановсы вахтаға баҫты. Вахтаның беренсе көндәрендә ташсыларҙан Мостафин, Хәбибуллин, Гордеев һәм Сайфуллин иптәштәр 2—3 норма үтәй башланылар.

Өфө ҡала Советы депутаты иптәш Князева етәкселек иткән бригада үҙ эшен айырыуса яҡшы сифатлы итеп башҡара. Бында нормалар икеләтә арттырып үтәлә.

И. Чанышев.

Нефть ҡалаһында май алды ярышы

ОКТЯБРЬСК. (Телефон аша). «Туймазынефть» тресының беренсе номерлы конторағы бораулаусылары беренсе квартал заданиеһын срогынан алда, 25 мартҡа үтәп, ярышта алдынғылыҡты алғайнылар. Улар нефть ҡалаһы предприятиеләре коллективтәре араһында май алды социалистик ярышын йәйелдереүҙә лә инициатор булдылар. Бораулаусылар һәм вышка төҙөүселәр апрель айында пландан тыш бер скважинаны эксплоатацияға тапшырырға һәм бер вышка төҙөргә йөкләмә алып, 1 Май байрамын достойно ҡаршылау өсөн ҡаланың бөтә нефтселәрен һәм төҙөүселәрен ярышҡа ҡушылырға саҡырып мөрәжәғәт иттеләр.

Был саҡырыу бөтә предприятие коллективтәре араһында йәнле отклик тапты. «Туймазынефть» тресына ҡараған торлаҡ төҙөлөшө конторағының коллективы апрель планын 150 процентҡа үтәргә, ә 1948 йылдың беренсе яртыһында нефтселәргә пландан тыш 150 квадрат метр торлаҡ майҙаны төҙөп бирергә ҡарар иттеләр. Коллектив март айында төҙөлөш планын арттырып тамамлағайны.

Тресттың электр станцияһы эшселәре бораулаусыларҙың мөрәжәғәтенә яуап итеп, апрель айында электр энергияһы биреү заданиеһен 110 процентҡа үтәргә, ә бының өсөн 10 апрелгә тиклем бер энергопоезды эксплоатацияға тапшырырға йөкләмә алдылар. Был энергопоезды ходҡа ебәреү электр станцияһының көсөн 25 процентҡа арттырасаҡ һәм яҙғы ташҡын ваҡытында станцияның өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итәсәк.

И. Болдогоев.

Төҙөлөш тресына күсмә Ҡыҙыл Байраҡ бирелде

ЧЕРНИКОВСК. Управляющийы иптәш Башилов булған төҙөлөш тресының коллективы производство программаһын айҙан-айға арттырып үтәп килә һәм ул продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 3,6 процентҡа кәметеүгә өлгәште. Был уңыштары өсөн трестҡа СССР Министрҙар Советының һәм ВЦСПС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағы, шулай уҡ 225 мең һум күләмендәге беренсе премия бирелде.

Төҙөүселәр был уңыштарға ныҡышмалы хеҙмәт арҡаһында өлгәштеләр. Биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә коллективта гүзәл стахановсылар үҫеп сыҡты. Эш нормаларын даими рәүештә 150—200 процентҡа үтәүсе балта оҫтаһы В. Винокуров, М. Шаяхметова, Х. Агзамов, ташсы С. Лежнев, В. Ситкин, слесарь А. Пастухов, В. Сандаков һәм күп кенә башҡа иптәштәр бының асыҡ миҫалы булып торалар.

Партия ойошмаһы (секретаре иптәш Селеевский) социалистик ярыш менән конкрет етәкселек итә. Участка һәм бригадаларға беркетелгән агитаторҙар ярыш договорының үтәлешен үҙ ваҡытында тикшереп, һөҙөмтәһен һәр бер эшсегә еткереп баралар. Алдынғы эшселәрҙең гүзәл эш тәжрибәләре башҡаларға күсерелә.

Социалистик ярыш алдынғылары бүләкләнә һәм почет таҡтаһына яҙыла. Ғинуар һәм февраль айҙарында ғына 400 кешегә 300 һумдан алып 1000 һумға тиклем аҡсалата премия бирелде.

Алдынғы стахановсыларҙы дәртләндереү хеҙмәт етештереүсәнлеген тағы ла юғарыраҡ күтәреүгә, коллективҡа тағы ла энергиялы эшләргә, артта ҡалыусы эшселәрҙе алдынғыларға тиңләшеү өсөн тырышып эшләргә мобилизовать итә.

Политик-массовый һәм ойоштороу эштәрен систематик рәүештә алып барыу арҡаһында коллектив I квартал планын 25 мартҡа уҡ үтәне. Треста торлаҡ йорттарын төҙөү эштәре лә яҡшы ойошторолған. Мәҫәлән, ағымдағы йылда ғына 133 мең квадрат метр күләмендә торлаҡ төҙөлдө.

Хәҙер эшселәр, инженер-техник работниктәр май алды социалистик ярышына ҡушылып, апрель планын март айына сағыштырғанда 19 процентҡа арттырып үтәргә йөкләмә алып стахановсы вахтаға баҫтылар.

И. Ниғмәтуллин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

22 кеше отличник значогы менән наградланды

Өфө яҙыу машиналары заводы коллективы ҡала предприятиеләренең социалистик ярышында алдынғылар сафында бара. Завод производство программаһын айҙан-айға уңышлы рәүештә үтәп килә. Быны заводтың эшселәре үҙҙәренең фидакәр хеҙмәттәре менән яулап алдылар. Икешәр һәм унан да артығыраҡ норма биреүсе стахановсылар бында тиҫтәләп иҫәпләнә.

Даңлы хеҙмәттәре өсөн ошо көндәрҙә заводтың 22 работнигы «РСФСР урындағы промышленность отличнигы» значогы менән наградланды. Наградланыусылар араһында завод директоры А. Ракитин, баш инженер К. Петренко, директор урынбаҫары Суровцев, лекальщик Нассонов, слесарь Мөхәмәтьянов, слесарь-инструментальщик Осипов, токарь Беспалов һәм башҡа иптәштәр бар.

Наградланыусылар тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, 1 майға икешәр айлыҡтан артығыраҡ норма үтәргә һүҙ бирҙеләр.

Коллектив май алды социалистик ярышына ҡушылып, апрелдә 84 урынына 110 яҙыу машинаһы эшләп сығарырға, ауыл хужалығы машиналарына запас частәр етештереү буйынса 1 майға ике квартал планын үтәргә йөкләмә алдылар.

И. Акрамов.

Белорет тимер юлын өҙөклөктән сығарырға

Белорет тимер юлы 1948 йылдың беренсе кварталында бик насар эшләне. Йөк ташыу планын үтәү кимәле көндән-көнгә кәмей һәм ҡатмарлаша барҙы. Февраль айында тимер юлдың йөк ташыу планы 97,1 процентҡа үтәлһә, март айында инде 70 — 80 процентҡа үтәлде. Һуңғы көндәрҙә тимер юлында эш шул тиклем насарайҙы, икешәр-өсәр тәүлек буйына эш туҡталып тора. Һөҙөмтәлә Белорет заводтарының хәл иткес цехтары сырьеһыҙ, яғыулыҡһыҙ ултыралар.

Рәҙоттә тимер юл етәкселәре өҙөклөктө объектив сәбәптәргә яптыралар. Улар:

— Бөтә бәлә, таш күмерҙең түбән сифатлы булыуында, ремонт өсөн материал булмауҙа..., — тип тынысланалар. Ләкин эш улай түгел. Төп сәбәп тимер юл хужалығының ҡышҡа әҙерлекһеҙ инеүендә, производство планын үтәү өсөн эшлекле көрәш булмауҙа, хеҙмәт дисциплинаһының сиктән тыш йомшаҡ ҡуйылыуында.

Паровоздар паркы ғәфү ителмәҫлек насар эшләй. Тирлән менән Запрудовка араһында паровоздарҙың бер сәғәттә йөрөү тиҙлеге ғинуар айында 2,5 километрға, февралдә — 3,5 километрға түбән булды. Март айында был күрһәткестәр тағы ла түбәнерәк булдылар. Паровоздарға ремонт тейешле кимәлдә үткәрелмәй. «Ауырыу» паровоздар һаны 26 процентҡа етте. Ремонт эштәренең ашыҡ-бошоҡ үткәрелеүе арҡаһында тимер юлда авариялар, көтөлмәгән брак яһауҙар киң урын алды. Ошондай авариялар арҡаһында ике ай эсендә хәрәкәттең туҡталып тороуы 14 тәүлек тәшкил итә.

Деполарҙа паровоздарға ремонт үткәреү эштәре насар ойошторолған. Тирлән депоһында бер паровозды ремонтлау уртаса 5 сәғәткә, Белорет депоһында 4,5 сәғәткә һуҙлатып башҡарыла. Ремонттан сыҡҡан паровоздар эшләмәҫтән элек уҡ йыш ҡына ремонтҡа кире ҡайтарылалар. Сөнки уларҙың сифаты түбән була.

Тирлән депоһында партия ойошмаһы ла бар. Ләкин ул депоның производство тормошонан бөтөнләй ситтә тора. Цехта 51 коммунист эшләй. Ә партия ойошмаһының депо тормошонда етәкселек роле күренмәүе партия члендарының ҡойроҡта һөйрәлеүенә, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоу фактыларына килтерҙе. Ойошмала тороусы 14 коммунист-машинистың ун береһе производство планларын үтәмәй. Бынан тыш поездарҙа эшләүсе 8 коммунистың хеҙмәт күрһәткесе тағы ла насарыраҡ. Цех партия ойошмаһында (секретаре иптәш Безбородов) ике йылда бары өс тапҡыр партия йыйылышы үткәрелгән. Тирлән узелындағы партком секретаре иптәш Урцев был серьез етешһеҙлеккә килешеп ҡараған. Һөҙөмтәлә депола хеҙмәт дисциплинаһы сиктән тыш йомшарған, коммунистар производство планы үтәүҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр. Ә план айҙан-айға өҙөлөп килә.

Фактылар, Белорет тимер юлының иң реаль эске мөмкинлектәре күҙләгәнгә ҡарағанда, тимер юл етәкселәренең, беренсе нәүбәттә уның начальнигы Мясоедов иптәштең үҙ коллективын биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү көрәшенә большевиктарса ойошторманлығы тураһында һөйләйҙәр. Сөнки Белорет тимер юлында шул уҡ көсөркәнешле шарттарҙа гүзәл хеҙмәт өлгөләре күрһәткән йөҙҙәрсә кешеләр бар. Мәҫәлән, машинист Королев, Тюрин, Перменов иптәштәр шул уҡ паровоздар менән стахановса эшләйҙәр. Иптәш Севеков етәкселек иткән Шушпа станцияһында поездар тәртип менән ҡабул ителәләр һәм үҙ ваҡытында оҙатылалар. Был станцияла эшләүсе стрелочница Пиянина күптән инде өлгөлө хеҙмәт итә, үҙ бурысына намыҫлы мөнәсәбәт күрһәтеп килә. Белорет тимер юлында бындай намыҫлы кешеләр күп. Тик уларҙың эш тәжрибәләре башҡа эшселәргә барып етмәйҙәр.

Социалистик ярыш һәм алынған йөкләмәләрҙе үтәү — бик күп кәңәшмәләр, ултырыштар үткәреү, бушҡа ҡысҡырыныуҙар менән алмаштырылған. Үтәлеште ысын тикшереү юҡ. Тимер юлдың партия, профсоюз ойошмалары айырым участкаларҙа күпме стахановсы, күпме ударник барлығын да белмәйҙәр. Ошолай булғандың һуңында ярыштың һөҙөмтәле булыуы мөмкинме һуң?!

Паровозда, поездарҙа йөрөүсе бригадаларға нормаль эш шарттары тыуҙырылмаған. 40—50 сәғәтләп юлға сыҡҡан тимер юлсылар йылы аш ашай алмайҙар. Сөнки станцияларҙа уларға йылы аш әҙерләү, башҡа элементар шарттар тыуҙырыу кеүек иң кәрәк мәсьәләләр менән ҡыҙыҡһынған кеше юҡ.

Металлургия комбинаты етәкселәренә лә тимер юлдың насар эшләүенә зарланыуҙар менән генә сикләнмәҫкә, ә тура-нан-тура үҙҙәренә буйһонған юлдың нормаль эшләүе өсөн ҡырҡа саралар күрергә ваҡыт.

Артта ҡалыуҙың ысын сәбәптәрен асыу, тимер юлдағы тәүге партия ойошмаларының һәләтлектәрен күтәреү, партия-политик, партия-ойоштороу эштәрен яҡшыртыу, хужалыҡсыларҙың эшмәкәрлегенә контроль һәм етәкселекте, талапсылыҡты һәм ярҙамды көсәйтеү, шул нигеҙҙә тимер юлды өҙөклөктән сығарыу партия ҡала комитетының мөһим бурыстарының береһе булып торорға тейеш.

М. Хәйҙәров.

Советтәр Союзында



Армения ССР-ы. Ереванда ауыл хужалығы машиналар заводы колхоз гидроэлектр станциялары өсөн билдәләнгән һәм 20,5 киловатт ҡеүәтле «Микро ГЭС» турбиналарын эшләп сығара башланы. Завод ай һайын ошондай 30 турбина эшләп сығарасаҡ.

Һүрәттә: Бригадир В. Терзян (унда) һәм эшсе Н. Вадоян «Микро ГЭС» турбинаһы өсөн генераторҙы эшләйҙәр. Иптәш Терзян бригадаһы үҙенең планын ике тапҡырға арттырып үтәй.

П. Луценко фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Колхоздарҙы һәм совхоздарҙы газ менән тәьмин итеү

ТРОИЦК (Чкалов өлкәһе). (ТАСС). Красно-Партизан районы В. П. Чкалов исемендәге совхозда газ үткәреү торбаһын һалыу эше тамамланды. Солтангол ауылынан килгән арзанлы яғыу материалы менән совхоздың мастерскойҙары, электр станцияһы һәм больница, клуб, мәктәп һәм башҡа культура көн-күреш, общественный учреждениеләр тәьмин ителәләр. Совхоз работниктәре торған 38 йорт газ менән йылытыла.

Ағымдағы йылда эксплоатацияға бирелә торған, Солтангол—Яңы-Степановка араһында газ торбаһын үткәреү Богорослан, Асекеев, Красно-Партизан һәм башҡа районларҙың 60 совхоз һәм колхоздарына яғыулыҡ бирәсәк. 15 совхоз һәм колхозға газ бирелде лә инде.

Белоруссияла яҙғы йәрминкә

МИНСК. (ТАСС). Белоруссияның промышленность поселкаларында һәм район үҙәктәрендә яҙғы йәрминкәләр башланды. Урындағы сауҙа ойошмалары, кооперациялар һәм колхозсылар һатыу өсөн ҙур күләмдә мануфактура, трикотаж, аяҡ кейемдәре, ауыл хужалығы продукттары, балсыҡтан яһалған һауыттар, тимер әйберҙәре, керосин, шырпы һәм башҡа шундай тауарҙар килтерҙеләр. Бөтә урындарҙа промышленность һәм ауыл хужалығы тауарҙарының хаҡтары байтаҡ түбәнәйҙе.

Яҡын арала Минск, Гомель, Витебск, Могилев, Бобруйск, Брест ҡалаларында яҙғы йәрминкәләр асыласаҡ.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына дан!

Өлкән механик

— Николай Зиновьевичте әйтәм, ҡасан йоҡлай икән? — тине тракторист Баязитов, маңлай тирҙәрен һөртә-һөртә. — Бына беҙ һинең менән тыныс эшләйәк, туйғансы ял итәбеҙ. Ә уға... Ул бит бер үҙе, Ҡайҙан шул тиклем барыһын да белә, Трактор моторының дөрөҫ эшләү-эшләмәүен уҡ саҡырымдан шаулауынан ишетеп һиҙә... Врач ул. Тракторҙар врачы!

Трактор бригадаһы бригадире Баязитовтың үҙ яҙмасыһына Бөрө районы Базан МТС-ы өлкән механигы Николай Зиновьевич Ламодуров тураһында былай һөйләүе һис тә юҡҡа түгел ине.

Ысынлап та, Ламодуровтың ҡасан ял итеүе тураһында күптәр аптырайҙар. МТС-та уның менән кәңәшләшмәгән, һорау бирмәгән кеше юҡ, ләкин һәр кемгә булған ығымлылыҡ, ябайлыҡ арҡаһында кешеләр генә уға ихтирам итмәй. Өлкән механик булған кешене бер ҡараһаң, мастерскойҙа, икенсе ҡараһаң, ремонтлаусы трактористәр янында, хатта тракторҙың аҫтына инеп үҙе тәҙәтә башлағаны да күреп була. Ул кешене:— «тракторҙың ниҫә шөрөптән торғаны һанамайынса ла белә» тиһәң, һис ныҡлыш булмаҫ.

Башта ул комбайнер ине, һуңынан тракторҙы яратты. Күп тә үтмәй, трактор бригадаһының бригадире булып эшләне. Шул йылда уҡ уны Бәләбәй ҡалаһының механизаторҙар курсына ебәрҙеләр. Уҡып МТС-ҡа ҡайтҡас, бригадаларҙа ремонтлау буйынса слесарь, ә һуңынан инде мастерскойҙа браковщик һәм 1942 йылға тиклем ауыл хужалығы инвентарҙарын ремонтлау буйынса механик булып эшләй.

1946 йылдың дүртенсе кварталында һәм 1947 йылдың беренсе кварталында тракторҙарҙы ремонтлау эшен иптәш Ламодуров бригадно-узловой метод менән ойошторҙо һәм был юғары һөҙөмтәләр бирҙе.

Николай Зиновьевич һәр йылды тракторҙарҙы ремонтлау сифатына ныҡлы иғтибар итте, сөнки ул бөтә сезон эшенең һөҙөмтәләре шуға бәйләнешле икәнен белде.

1946—1947 йыл эш сезонында Базан МТС-ы тракторының береһе лә эш ваҡытында ватылып, тукталып тормаңы, трактористар ерҙе һөрөү, тырматыу, ашлыҡ сәсеү, урожай йыйнау һәм башҡа эштәрҙе үҙ ваҡытында башҡарҙылар һәм Базан МТС-ы үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа юғары урожай алыуҙы тәьмин итте.

Шуның өсөн Николай Зиновьевич Ламодуровҡа СССР Верховный Советы Указы менән Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

Базан МТС-ы тракторҙары ҡар ереү менән баҫыуға сығырға әҙер торалар. Һәм улар тағы ла мул урожай аласаҡ кешеләр тураһында, тыуасаҡ яңы геройҙар хөрмәтенә дан йырлаясаҡтар.

Н. Булаков.

Дмитрий Нестеров

Урындағы шарттарҙа арыш үҫтереүҙең агротехникаһы тураһындағы беседаны колхозсылар бик ҡыҙыҡһынып тыңланылар ҙа, һүҙ был культураны тап бына уларҙың үҙҙәрендә, «Горный труд» колхозы баҫыуында сәсеү мәсьәләһенә күскәс, клуб залында шау-шыу күтәрелде. Арттағы рәттәрҙә ултырған ҡарттар агрономдың һүҙен бүлеп, урындарынан торҙолар.

— Беҙҙә үҫмәй ул арыш,—тинеләр улар, — ата-бабалар ҙа, үҙебеҙ ҙә арыш сәсеп, бура тултыра алманыҡ...

— Арыш сәсмәгән өсөн бойҙайҙан да рәтле урожай ала алмайһығыҙ инде, —тип һүҙен дауам итте агроном. — Һәр ваҡыт бойҙай ғына сәсеп ерҙең «майын» ҡороттоҡанһығыҙ. Беҙҙең шарттарҙа арыш сәсмәй тороп, бойҙайҙың урожайлылығын күтәреү тураһында уйларға ла ярамай.

Залда тағы ла тынлыҡ урынлашты. Был ҡаҡса кәүҙәле, тура ҡарашлы кешенең — Дәүләкән МТС-ы өлкән агрономы Дмитрий Леонтьевич Нестеровтың — ихлас күңелдән һөйләгән һүҙҙәрен ҙур иғтибар менән тыңламаҫҡа мөмкин түгел ине...

Ул саҡта — 1935 йылдың яҙйендә «Горный труд» колхозының колхозсылары агрономдың кәңәшен тотоп, 30 гектар ғына арыш сәстеләр. Икенсе йылда тәжрибәле ҡарттарҙы ла, тирә-яҡ ауылдарҙы ла ғәжәпкә ҡалдырып, һәр гектарҙан 15-әр центнер урожай йыйнап алдылар.

Тағы ла ике йылдан Дәүләкән МТС-ы хеҙмәтләндергән бөтә колхоздар ҙа арыш сәсә башланылар. Быға өлгәшеү өсөн өлкән агроном колхоздарҙа агрономик пропаганда эштәре алып барыу менән генә сикләнмәне, әлбиттә. Һөрөү, сәсеү осоронда ғына түгел, ҡышын һәм яҙын да, урожай йыйнау көндәрендә лә колхозсылар өлкән агрономды үҙҙәре эргәһендә күрергә күнектеләр. Һәр бер колхозда агротехника түңәрәге ойошторолдо. Арыш үҫтереүҙә алдынғыларҙың тәжрибәһе үҙ ваҡытында бөтә колхоздарға ла күсерелә барҙы.

1938 йылда МТС хеҙмәтләндергән зонаһағы колхоздарҙа арыштың һәм бойҙайҙың урожайлылығы һуңғы алты-етә йыл менән сағыштырғанда тәп-тәүәл бер центнерға күтәрелгән икән, был эшкә өлкән агроном Дмитрий Леонтьевичтең ҙур көс һалғанлығы һәр кемгә билдәле. Күп баҫыулы сәсеү әйләнеше индерелмәй тороп, бындай уңышҡа ирешеү тураһында уйларлыҡ та түгел ине. Ватан һуғышына тиклемге 4—5 йыл ваҡыт эсендә, арыш сәсеүлектәренең майҙанын киңәйтеү менән бер рәттән, күп йыллыҡ үләндәр үҫтереү буйынса ла ҙур эш алып барырға тура килде. Сөнки был яҡтарҙа йыл һайын ҡабатлана торған ҡоро елдәрҙең, «ҡара тупраҡ бурандарының» һәләкәтенән күп йыллыҡ үлән — костер һәм люцерна сәсеү менән генә ҡотолорға мөмкин ине. Бына шуның өсөн дә Дмитрий Леонтьевич сәселгән һәр гектар үләнде тәрбиәләп үҫтереүгә, һәр килограмм орлоҡто ҡәҙерләп һаҡлауға айырыуса иғтибар бирә торған булды.

* *

Яҙға сыҡҡас та тиреҫ шыйыҡсаһы әҙерләү тураһында һүҙ ҡуҙғалғас, «Красный боевик» колхозының председателе Старков өлкән агрономдың күҙ алдында уҡ үҙенең фекерен әйтеп һалды:

— Арышты, Дмитрий Леонтьевич, үҙең беләһең, тиреҫләнгән ергә сәстек. Тиреҫ шыйыҡсаһы, ҡош тиҙәге кеүек нәмәләр менән булышыу, эш арттырыу ғына булыр.

— Эш арттырыу түгел — урожайҙы арттырыу тураһында һүҙ бара. Бына «Труд» колхозында уҙған йылды өҫтәмә аҙыҡландырыу урожайҙы 20 процентҡа арттырыраҡ бирмәнеме ни?

Шунда, колхоз правлениеһының канцелярияһында уҡ, Дмитрий Нестеров арышты яҙ көндәрендә өҫтәмә аҙыҡландырыуҙа күрше колхоздарҙың тәжрибәһен һөйләп бирҙе.

Һүҙҙән эшкә күсер ваҡыт еткәс — яҙғы ҡар һыуҙары киткәс, Дмитрий Леонтьевич тағы ла баҫыуҙарға сыҡты һәм көҙгә тиклем МТС контораһына бик һирәк кенә ҡайтып йөрөнө. 1947 йыл — игенселек фронтында ҙур еңеүҙәр йылы, уға тиклем өлкән агроном булараҡ алып барылған эште йомғаҡлау осоро булды. Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу һөҙөмтәһендә «Красный боевик» колхозында 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 8-әр центнерға артығыраҡ, ә башҡа колхоздарҙа 18—20 процентҡа артығыраҡ урожай алынды. Һәр бер колхозда юғары урожай звенолары үҙҙәренең еңеүҙәрен тантана иттеләр.

Бөтә МТС коллективе юғары урожай өсөн көрәштең тантанаһын үҙгәра хәҙер. Сөнки, башҡалар менән бергә, МТС-тың өлкән агрономы Дмитрий Леонтьевич Нестеровҡа ла почетлы исем — Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

...Яҙ етте. Колхоз баҫыуҙарында бына бик тиҙҙән моторҙарҙың ҡеүәтле тауыштары гөрләр. Ул көндәрҙе Дәүләкән МТС-ы механизаторҙары яҡшы әҙерлек менән ҡаршылайҙар. Социалистик Хеҙмәт Геройҙары — Павлов, Тарасенко, Алехин иптәштәр һәм башҡа алдынғылар — бөтә коллектив ҡыш буйына көстәрен аямай эшләнеләр, 1948 йылда тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн нигеҙ әҙерләнеләр. Улар араһында агроном Нестеров һәр ваҡыт алдынғы сафта булды. Ул һәр бер колхоздың юғары урожай алыуға өлгәшеүе өсөн намыҫлы хеҙмәтен һала.

Ғ. Әхмәтшин.

СОЦИАЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙҘАРЫ

1947 ауыл хужалығы йылында Дәүләкән һәм Базан машина-трактор станциялары ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын үтәүҙә яҡшы уңыштарға өлгәштеләр. Юғары урожай өсөн көрәштә өлкән агроном Б. И. Титов һәм өлкән механик Н. Е. Тарасенко иптәштәрҙең ролдәре ҙур. Хөкүмәтебеҙ фидакәр хеҙмәтте юғары баһалап, уларға иң почетлы исемде — Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе.

Һүрәттә: (һулдан уңға) Базан МТС-ының өлкән агрономы Борис Иванович **Титов** һәм Дәүләкән МТС-ының өлкән механигы Николай Евдокимович **Тарасенко** иптәштәр.

Маҡтаулы игенсе

Районның алдынғы Карл Маркс исемендәге колхозы Баймаҡтан 25 километр. Аралағы юл ҡалын ҡарҙарға күмелгән таулыҡтар, йылғалар һәм баҫыуҙар аша һуҙыла. Юлда ҡаршы осраусы бер генә кеше лә юҡ. Тик Һаҡмар буйына төшкәс, аҙыҡ эҙләп юл буйына сыҡҡан төлкөләр генә осрай башланылар.

— Ах, Ғиниәттең ҡуш күбәге булһасы!—тине дилбегә тотҡан етеҙ хәрәкәтле, ҡәүҙәле йәш егет. — Уның ҡуш күбәге бер генә һәнлекте лә ҡотҡармай. Быйыл 18 төлкө, 5 бүре алған һунарсы ул, Ғиниәт.

— Фамилияһы Насировмы?

— Түгел, Дәүләтбаев. Беҙҙең Ярат ауылында Ғиниәттәр икәү. Береһе — аусы, икенсе — игенсе.

— Беҙ шул игенсене күрергә барабыҙ инде. Уны беләһегеҙме?

— Беләм, ул звеновод. Бына ошо ҡар аҫтында ятҡан баҫыуҙар уның звеноһыныҡы, — тине егет һәм толоп еңенә һабы инеп киткән сыбыртҡыһы менән баҫыуға күрһәтте. — Ә теге ҡар һөрөүсе — Фәткулла Утарбаев, звеноның стахановсыһы.

— Ҡыш та һөрәһегеҙ икән.

— Йыл әйләнәһенә. Юҡһа мул урожай алып булмай бит, — тине ул.

Ауылға килеп ингәндә, өйҙәрҙә электр лампочкалары балҡый ине.

Игенсек председатель Ибраһим Уйылданов правлениеға звено етәкселәрен саҡырҙы. Улар араһында кисә беҙҙе колхозға алып килеүсе егет тә бар ине.

— Таныш булығыҙ, Ғиниәт Насиров була был егет, — тине председатель.

— Һин бит кисәге егет!

— Кисәге егет — бөгөн дә егет, — тине ул йылмайып һәм ҡул бирҙе.

Ғиниәт Насиров — колхоз ауылында тыуған, колхоз семьяһында тәрбиәләнгән һәм хеҙмәт даны яулап алған 19 йәшлек егет ул. Был тырыш комсомолецте колхозда һәр кем хөрмәт итә.

Бынан бер йыл элек, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын өйрәнеп, бригадала звенолар ойоштороу өсөн етәкселәр һайлаған саҡта уҡ Ғиниәттең исеме беренсе булып телгә алынды.

Колхозда звено ойоштороу яңы эш ине. Ләкин һәр бер прогрессив ынтылышты, яңылыҡты ихлас ҡабул итеүсе йәш колхозсы аптырамаҫы, эште өйрәнеү һәм әҙерләнеүҙән башланы. Агроном, агротехник, бригадир һәм председателдең тулы аңлайышлы кәңәш һәм беседалары менән дә сикләнмәне ул. Ауыл мәктәбе, библиотека, колхоз правлениеһе тарафынан алдырыла торған газеталарҙы, журналдарҙы һәм китаптарҙы аҡтарҙы, звеноларҙың эшен ныҡлап өйрәнде.

— Беҙ,—тине ул звено члендәренең тәүге йыйылышында, — ашлыҡты бөтә йыл буйына фән талаптарынса үҫтерергә тейешбеҙ. Шулай эшләү генә юғары урожай алыуҙы тәьмин итер.

1947 йылғы яҙ иртә килде. Ошо иртә яҙ менән уҡ Ғиниәт звеноһы баҫыуҙа ине. Ҡыш әҙерләнгән 40 центнер көл һәм ҡоро көйгә онталған 3 центнер ҡош тиҙәге менән ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды һәм һуңынан тырматылды.

25 апреллә звено һабанға төштө. Һабансы Фәтхислам Үҙәнбаев, Мәүлем Мәғәфуров, Нурия Исчурина һәм Мөхәммәт Ҡарамурин иптәштәр һөрөүҙә, Бәдриниса Ғәделшина, Роза Рысбаева, Фатима Аҙаматова иптәштәр ерҙе дискалау һәм тырматыуҙа, Фәтхулла Утарбаев сәскес машинаһында күп көндәрҙә норманы арттырып үтәнеләр. 2 майға тиклем 20 гектар майҙан һөрөлдө, дискаланды, ике ҡат арҡылы-буйлы тырматылды һәм һәр гектарға 1,30 центнер иҫәбенән теҙмә сәскес менән бойҙай сәселде.

Сәсеүлектәр яҙҙан алып, көҙгә тиклем тәрбиәләнде, һаҡланды.

Һеҙәмтәләр һоҡланырғыс булды. Юғары урожай участкаһындағы 11 гектар арыштың һәр гектарынан 184-әр бот, дөйөм майҙандағы 16 гектар арыштың һәр гектарынан 144-әр бот урожай алынды.

* * *

Карл Маркс исемендәге колхозда ошо көндәрҙә Мөхәммәтхәбиб Әхмәтов бригадаһы члендәренең йыйылышында Алтай крайы игенселәренең юлбашсыбыҙ бөйөк Сталинга яҙған хаты өйрәнелде. Колхоздың игенселек мастерҙары быйыл да юғары урожай үҫтерергә социалистик йөкләмәләр алдылар.

— Беҙҙең звено,—тине йыйылышта Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғиниәт Насиров, — Алтай игенселәренең юлбашсыбыҙға яҙған хатын үҙ хаты итеп ҡабул итте. Беҙ быйыл звенобыҙға беркетелгән 32 гектар арыштың һәр гектарынан 31-әр центнер, 60 гектар бойҙайҙың һәм 30 гектар һолоноң һәр гектарынан 13-әр центнер урожай алырға һүҙ бирабеҙ һәм башҡа звеноларҙы ярышҡа саҡырабыҙ.

Йөкләмәне үтәү өсөн бөтә хәстәрлектәр күрелә. 1948 йылда тағы ла ҙурыраҡ уңыштар өсөн көрәш ҡыҙа, киң йәйелә.

Файзи Бикбов.
Баймаҡ.

Әҙле аҙымдар

1944 йылдың 24 майында һуғыштан уҡ аяҡһыҙ ҡайтҡан Федор Андреевич Рябов менән һуғышҡа тиклем бергә эшләгән Базан МТС-ы директоры ла, өлкән механик та эш хаҡында һүҙ ҡуҙғатырға ҡыймаңылар. Ләкин «Федор Андреевич, һин МТС өсөн һауа шикелле кәрәкһең», тигән һүҙҙе директорҙың һәм өлкән механиктең ҡараштары ғына түгел, ишек алдында хәрәкәтһеҙ торған тракторҙар ҙа әйткән шикелле ине.

Мәсьәләне оҙаҡ уйлап хәл итергә ваҡыт булмаңы. Директорҙың: «Федор Андреевич, ауыр булһа ла, ярҙам итегеҙ, малайҙар йәштәр, бригада менән етәкселек итеүсе кеше юҡ...» тип әйтеүе һуң ине инде. Рябов тыуып үҫкән Тартыш ауылына госпиталдән ҡайтышлай МТС-ҡа кереп сыҡҡанда уҡ ул турала үҙе яҡшы аңлағайны һәм тракторҙан ситтә йәшәү уға мөмкин түгеллеген белгәйне.

—Тракторҙарға йән керҙе,—тинеләр трактористар — Михаил Байтимиров менән Чабай Исәнбаев, үҙ-ара һөйләшеп. — Беҙҙең бригадир алтын бит, ә?

Ысындан да, Рябов бригаданы ҡабул иткәндә, тракторҙарҙың береһе лә төҙәк түгел ине. Ул тракторҙарҙы яҡынан һүтеп яһаған кеүек ҡорҙо: поршень группаһын яңынан ҡараңы, тиҙлек коробкаһындағы шестерняләрҙе, подшипниктарҙы алмаштырҙы, запас частар булдырҙы һәм машиналар бер ваҡытта ла туҡтамаңылар.

— Мөмкин тиклем әйбәтерәк һөрергә, күберәк һөрергә,—тине Рябов трактористарға һәм һәр бер трактор янына килеп уны тыңлап, рулгә ултырып үҙе һөрөп ҡараңы.

— Әйбәт һәм күберәк һөрергә,— тип ҡабатланылар трактористар.

Шуның өсөн лә, 1946 йылда план буйынса бригада 180 гектар урынына 240 гектар пар һөрҙө. Шул йылдың июнь баштарында культивация ... июль аҙаҡтарында парҙы икенсе тапҡыр һөрергә лә өлгөрҙөләр. 1946—1947 йыл эш сезонында Рябов етәкселек иткән трактор бригадаһы 1946 йылдың 1 августынан 10 августына тиклем арыш сәсеүҙе тамамланы. Сәсеү бөтөү менән туңға һөрөүҙе башланы һәм норманы икеләтә арттырып үтәне.

— Ваҡытында һәм сифатлы итеп эшләргә, — тине агроном Рябовҡа һәм бригадир быны бик яҡшы аңланы һәм кәңәште үтәне.

Эште ваҡытында бөтөрөү өсөн тракторҙарҙың өҙләкһеҙ эшләүҙәре кәрәк һәм Рябовты, тәжрибәле бригадирҙы, машиналар менән осрай торған көтөлмәгән хәлдәр ҡурҡытмаңы. Машиналарҙың өҙләкһеҙ эшләүен ул һәр ваҡыт уларҙы ремонтлаған саҡта тәьмин итте. Тракторҙар яҙ көндәрендә колхоз баҫыуҙарына килгәс тә, ентекләп ҡаралдылар, ауыл хужалығы инвентарҙәре тикшерелделәр. Бригада члендәре араһында хеҙмәт дөрөҫ ойошторолдо. Бригадир сменалар алышынған саҡта бөтә трактористарҙың да булыуҙарын тәьмин итте, эште тапшырыусы сменаның бөтә етешһеҙлектәрен иҫәпкә алды һәм бригаданың һәр бер членына уларҙы бөтөрөү юлдарын өйрәтте.

Намыҫлы хеҙмәт, үҙ эшең өсөн янып Бөрә районы Базан МТС-ы тракторҙар бригадаһы бригадиры Федор Рябовты уңышлы һөҙөмтәләргә килтерҙе. Уның бригадаһы хеҙмәтләндергән «Сулпан», «Борец» колхоздары баҫыуҙарында иген иҫ киткес уңды. 183 гектар ерҙән арыштың төшөмө һәр гектарҙан 22 центнер 70 килограмға етте.

Партия һәм хөкүмәт иптәш Рябовтың хеҙмәтен ҙур баһаланы, уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе.

Ҡыйынлыҡ менән һәр атлаған аҙым бушҡа үтмәне, һәр баҫҡан эҙ ерҙә ҡалды һәм уйла хеҙмәт даны булып алтын ... үҫтеләр.

Назар Нәжми.

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

Тотош электрләштереү юлында



Мәсетле районын уртаға ярып аҡҡан Әй йылғаһына бер нисә йылға ҡушыла. Был йылғаларҙың көсөн файҙаланыу бынан бер нисә йыл элек проблема булып тора ине. Тик колхоз төҙөлешө генә ул йылғаларҙың ҙур көсөн — энергияһын файҙаланыуҙы хәл итә алды.

Район үҙәге — Усть-Икин ауылында 1939 йылда Ик йылғаһында колхоздар көсө менән 200 киловатт ҡеүәтле гидроэлектр станция һалынды. Был станция ул ваҡыттан бирле 16 ауыл хужалығы артеле колхозсыларының өйҙәрен Илич лампочкалары менән яҡырта. Унан тыш ул район үҙәгендәге йорттарҙы һәм общественный биналарҙы, совхозды һәм МТС-ты, урындағы промышленность предприятиеләрен хеҙмәтләндерә.

1947 йылда 9 колхозда ашлыҡ һуғыу, орлоҡ таҙартыу электр көсө менән башҡарылды һәм күп кенә колхоздарҙың тимерлектәре, мастерскойҙары электр энергияһы менән эшләүгә ҡулайлаштырылды.

Үткән йылда был станция электр энергияһы эшләп сығарыу һәм уны файҙаланыу планын 112 процентҡа еткереп үтәне.

Усть-Икин гидроэлектр станцияһы 1948 йылда колхоздарҙа хеҙмәтте артабан механизациялаштырыуҙы планлаштыра. Быйыл өсөн иң элек станцияның көсөн арттырыу саралары күрелә.

Район алдында 1948—1949 йылдарҙа тотош электрләштереү бурысы тора. Был бурысты үтәү өсөн 1 ТЭС һәм 6 гидроэлектр станция төҙөү эштәре алып барыла. Ҡорғат, Ләмәҙ-Тамаҡ ауылдарында 25-әр киловатт көсөндәге ГЭС ҡороуҙа төҙөлөш эштәре 70—80 процентҡа үтәлде лә инде. Электрооборудованиелар килтерелә. Был станциялар 5 колхозды хеҙмәтләндерәсәк.

Мәслим ауылында 60 киловатт ҡеүәтендәге станция төҙөлөшөнә мең кубометр ағас материал талап ителә. Бының хәҙер 700 кубометрҙан артығырағы әҙерләнгән. Шулай уҡ Туҡбай, Таңш, Мәләкәҫ, Теләш ауылдарында ла электр станцияһы төҙөү эштәре алып барыла.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡта район тотош электрләштереләсәк.

Х. Мусин,
З. Хәфизов.

Буласаҡ инженер

— Аҡыллы, уңған ҡыҙ!, — тип Клараға бала сағында уҡ, барыһы ла һоҡландылар.

Ысынлап та тырыш, уңған ҡыҙ Клара Өфөнөң өсөнсө мәктәбен алтын медаль менән тамамлап, академик Губкин исемендәге Мәскәү нефть институтына һынауһыҙ уҡыуға алынды. Ул отлично уҡый, институтта комсорг. Клараға әле лә таныштары һоҡланалар. Был хәл, билдәле, уның әсәһе Ғәйшә апай күңелендә ғорурлыҡ уята. Әсә шат, шундай бәхетле ул. Ләкин Ғәйшә апай өсөн был бәхет еңел бирелмәне.

Шатлыҡ һыҙаттары уның йөҙөнән китергә лә өлгөрмәй, үткән ауыр көндәр иҫенә төшөп, уның тәҫе китә.

Ҡыш 1928 йыл... Уның ире, Ғизетдин Ғәлиев, район прокуроры, энергиялы совет работнигы. Ул халыҡ дошмандары—ҡулаҡтарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып бара. Дошман яуыз, мәкерле. Бына бер ҡараңғы төндә Стәрлебаш ҡулаҡтары уны үлтереп ташланылар. Ғәйшә Ғәлиева ике бала менән йәтим ҡалды. Ә Клара атаһын күрә лә алманы, атаһы үлгәндән һуң ғына тыуҙы. Совет Хөкүмәте йәтим ҡалған семьяға ата хәстәрлеге күрһәтте. Ғәйшә Ғәлиеваға персональ пенсия билдәләнде, улар Өфөгә күсеп килделәр.

Клара үҫте. Уның тыуыуы әллә үҙ иптәшенең трагик үлеме менән бер осорға бәйләнгәнгә инде, ул кесе ҡыҙын айырыуса яратты, яҡын күрҙе.

— Тап атаһына оҡшаған минең ҡыҙым. Ул да, Ғизетдин кеүек, ҡыйыу, эштә ныҡышмалы, — тип торғайны ул күршеләренә Клара тураһында.

Хәҙер инде Клараға егерме йәш. Ул тулы хоҡуҡлы совет кешеһе, юғары мәктәп уҡыусыһы. Бына йәш студенттар Ватанға күберәк файҙа килтереү өсөн киләсәктә ниндәй эшләргә пландар ҡоралар. Шатлыҡлы хыял. Клара ла яңы шундай ҙур уйҙар менән.

Сал сәсле профессор, күптән түгел, үҙенең бер лекцияһында Башҡортостандың Ишембай зонаһына инган нефть ятыштары тураһында һөйләне. «Ҡара алтын» ятыштары Стәрлетамаҡ, Маҡар, Стәрлебаш райондарына ла таралалар.

Стәрлебаш... Был исем әйтеле менән Клараның алыҫ ҡалға яҡын ҡайғыһы иҫенә төшә. Был ергә уның атаһының ҡаны тамған. Ер. Бай, гүзәл бейҙең ер. Ирк ер. Уның бәхете өсөн аҙмы атала ҡан ҡойҙолар... Клара инженер буласаҡ. Ул Стәрлебаш нефть промыселенә ҡайтыр һәм, атаһының ҡаны тамған ерҙе, үҙенең намыҫлы хеҙмәте менән биҙәр, гүзәлләр.

Б. Сафин.

Йәш нефтселәр слеты

Ошо йылдың 5 апрелендә Өфөлә Башҡортостандың йәш стахановсы нефтселәренең икенсе слеты асыла. Был слетта Туймазы, Ишембай нефть промыселдарынан һәм республиканың нефть эшкәртеү заводтарынан йәш нефтсе стахановсыларҙан 150 делегат ҡатнашасаҡ.

Слетта Башҡортостан нефтселәренең биш йыллыҡ планды дүрт йылда уңышлы үтәүҙәрендә йәш нефтселәрҙең бурыстары тураһында доклад була.

Слетта ҡатнашҡан делегаттар башҡаланың киноларына, театрҙарына барасаҡтар, шулай уҡ Өфө музейҙарында буласаҡтар.

Ҙур доход биреүсе тармаҡ

Беҙ игенселек һәм малсылыҡ менән бер рәттән, хужалыҡтың башҡа ярҙамсы тармаҡтарын үҫтереүгә лә ныҡлы иғтибар бирәбеҙ. Үҙған йыл 53 баш умартаның һәр береһенән дүртәр бот, ә бөтәһе 212 бот бал алып, колхозға ҙур доход килтергәйнек.

Алтай крайы игенселәренең сәләмәт ярыуына ҡушылып, быйыл һәр бер умартанан бишәр бот бал алыуға йөкләмә алабыҙ.

Н. Якушин,

Шаран районы «1 — Май» колхозы умартасыһы.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Т... промышленность һәм информация бүлектәре — 2—90-49.

П 00149.

Шахмат

Донъя беренселеге өсөн шахмат чемпионаты

1 апрелдә, Гаағанан Мәскәүгә донъя беренселеге өсөн шахмат чемпионатында ҡатнашыусылар — СССР чемпионы П. Керес һәм АҠШ чемпионы С. Решевский килде. Улар менән бергә совет шахмат делегацияһы етәксеһе Д. Постников, гроссмейстер И. Бондаревский һәм мастер А. Толуш ҡайтты.

Килеүселәрҙе аэродромда СССР Министрҙар Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт эштәре буйынса комитеттең вәкилдәре ҡаршыланылар.

Чемпионаттың башҡа ҡатнашыусылары — гроссмейстер М. Ботвинник һәм В. Смыслов, донъяның элекке чемпионы М. Эйве, шулай уҡ баш судья Югославия гроссмейстеры М. Видмар, Голландия шахмат федерацияһы президенты Циттерштейн һәм башҡалар Берлиндан Мәскәүгә килергә сыҡтылар.

Донъя беренселеге өсөн чемпионаттың икенсе яртыһы Мәскәүҙә Союздар йортонда 10 апрелдә башланасаҡ. (ТАСС).

В. Ғиззәтуллин республика чемпионы

Шахмат буйынса Башҡортостанда беренселек өсөн үткәрелгән матч-турнирҙа еңеп сыҡҡан өс шахматист — В. Ғиззәтуллин, М. Моисеенко һәм А. Фролов иптәштәр араһында көрәш ике аҙна самаһы барҙы. Фролов һәм Ғиззәтуллин иптәштәрҙең көрәше бик киҫкерҙенешле үтте. Билдәле булғанынса, Фролов шахмат искусствоһына Ғиззәтуллиндан өйрәнгән шахматист. Ул Ғиззәтуллиндек уйнау стилен, уңышлы һәм уңышһыҙ яҡтарын яҡшы белә. Шуның менән бергә, Фролов матч-турнирға ныҡ әҙерләнгән, һәм ул уйында ҡатмарлы, позицион алымдар күрһәтте.

Шуға күрә һуңғы турға тиклем чемпионлыҡты кем алыуы билдәле булманы. Турнир тамамланыр алдынан Ғиззәтуллиндең 4, ә Фроловтың 3,5 очкоһы бар ине. Уларҙың осрашыуы чемпионлыҡты хәл итте.

Матчтың һуңғы турында Ғиззәтуллин уйындың башында уҡ бик яҡшы уйнаны һәм Фроловты еңде.

Шулай итеп, Өфө ҡалаһының врачы В. Ғиззәтуллин шахмат буйынса республика чемпионы исемен алды.

БӨТӘ СОЮЗ ГИМНАСТИКА ЯРЫШЫНА

Ағымдағы йылдың апрель айында Мәскәүҙә «Большевик» спорт обществоһының гимнастика буйынса Бөтә Союз ярышы үткәрелә. Ошо ярышҡа ҡатнашыу өсөн Өфө физкультурниктарынан Колотов, Демченко, Попов, Беляева иптәштәр составында булған команда күптән түгел Мәскәүгә китте.

Шулай уҡ Ленинград һәм Ҡазан ҡалаларында ла «Спартак» һәм «Медик» спорт обществоларының Бөтә Союз ярышы үткәреләсәк. Унда Өфө гимнастарынан Мағазова, Ғадилов, Дергунов, Дол-

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Төркиә менән Греция араһындағы һөйләшеүҙәргә ҡарата Телепресс агентствоһы

ПРАГА, 31 март. (ТАСС). Телепресс агентствоһы Афинынан түбәндәге хәбәрҙе тапшыра: Төркиәнең сит ил эштәре министры Садаҡтың Афиныға барыуы Брюссель договорына оҡшашлы Төркиә-Греция пактын төҙөү маҡсатын тота, тип уйлайҙар. Был пакт Брюсселдә төҙөлгән Көнбайыш хәрби союзға ҡушымта булып торасаҡ. Садаҡ Афиныға килгәнгә тиклем унда сит ил эштәре министры Цалдарис һәм Төркиәнең Афинылағы посолы Уйналдың араһында оҙаҡ дауам иткән әҙерлек беседалары барҙы.

Официаль мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был беседаларҙың маҡсаты тышҡы политикала һәм экономик хеҙмәттәшлектә үҙ-ара аңлашыуҙы аяҡҡа баҫтырыу торһа ла, гректарҙың һәм төрөктәрҙең Италияны һәм бөтә ғәрәп илдәрен берҙәм блокҡа индереү планын эшләгәнлектәре билдәле. Был блок Вашингтон тарафынан хупланырға тейеш һәм был хуплау президент Трумэндең личный вәкиле Тэйлор Италияға килгәндән һуң үткәреләсәк. Тэйлор Италияның Көнбайыш һәм Урта диңгеҙ блоктары араһында ниндәй позиция алырға тейешлеге тураһында де Гаспериға инструкция яһарға тейеш.

АҠШ-тың Грециялағы хәрби миссияһы начальнигы генерал Ван Флит Греция менән Төркиә араһында алып барыла торған һөйләшеүҙәр артында йәшеренеп хәрәкәт иттереүсе көс булып тора. Ван Флиттең Греция һәм Төркиә араһындағы хәрби хеҙмәттәшлек менән айырыуса ҡыҙыҡһыныуы шуның арҡаһында килеп тыуа, сөнки ул Грецияға Америка ғәскәрҙәре урынына Төркиә частарын ебәрергә теләй, ә Греция монархистик-фашистары был ғәскәрҙәргә бик ныҡ мохтаж булып торалар. Америка ғәскәрҙәрен Греция монархистик-фашистарына ярҙамға ебәреү әлегә тиклем мөмкин булманы, сөнки АҠШ-тың общественный фекере быға ыңғай ҡараманы. Төркиә частары Грецияның монархистик-фашистик ғәскәрҙәренә уларҙың Грецияның азат итеүсе көстәренә ҡаршы бер нисә тапҡырҙар иглан ителгән яҙғы сығыштарына ярҙам итергә тейеш буласаҡтар. Греция менән Төркиә араһында блок булғанда Төркиә армияһы эстән һәм тыштан ҡурҡытыуҙарға дусар ителә торған Грецияның король хөкүмәтенә ярҙам итеү» маҡсатында Грециялағы һуғыш хәрәкәттәренә тығыла алыр ине.

Италиялағы фашистик заговор тураһында „Республика“ газетаһы

РИМ, 1 апрель. (ТАСС). «Республика» газетаһы Туриндән, бында булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, конспиратив фашистик ойошма ФНА («большевиктарға ҡаршы фронт») 18 апрелдәге һайлауҙар христиан-демократик партия өсөн кире һөҙөмтә бирә ҡалһа, киң тамыр йәйгән заговорҙы государство переворотын эшләү маҡсатында үҙ ҡулында туплай, тип хәбәр итә. Заговор Италияла фашистик режимде аяҡҡа баҫтырыуҙы, 1943 йылдың 25 июненән һуң (Бадальоның власҡа килеүе), һәм 1946 йылдың 2 июненән һуң (һайлауҙар һәм референдум) властан бер ни тиклем ситләтелгән политик көстәрҙе яңынан власҡа ҡайтарыр өсөн партияларҙы, парламентте һәм демократик азатлыҡтарҙы бөтөрөү маҡсатын тота.

Газетаның мәғлүмәттәренә ҡарағанда, был заговор тураһында де Гаспери хөкүмәтенең ҡайһы бер йоғонтоло члендарына билдәле булырға тейеш. ФНА штабы 1947 йылдың апрель айында төҙөлгән.

«Мовименто сочиале итальяно» тигән легаль фашистик ойошма төҙөлгәндән һуң һәм Америка, Англия йәшерен хеҙмәт органдары тарафынан ярҙам күрһәтелгәндән һуң, ФНА үҙ ҡарамағына ҡорал һәм средстволар алды. Үҙған йылдың декабрь айында Мессинда был ойошма етәкселәренең йәшерен кәңәшмәһе булғандан һуң был ойошманың башына маршал Джованни Мессе ҡуйылды. 19 февралдә Римдә ОВРА-ның (фашистик йәшерен полиция) элекке агенты һәм хәҙер эске эштәр министрсе Пиек ярҙамында ФНА етәкселәренең яңы кәңәшмәһе булды. Был кәңәшмәлә 21 кеше, шул иҫәптән, «Интеллидженс сервис» вәкиле, Дидс тигән бероу һәм башҡа заговорсылар ҡатнаштылар.

Был кәңәшмәлә, ҡоралды сығыш була ҡалһа, ФНА ойошмаһына инеүсе подпольелағы ярым легальный һәм легальный группаларҙың һәм ойошмаларҙың хәрәкәт итеү пландары эшләнде. План фетнәселәрҙең, полицияның һәм армияның бергәләп хәрәкәт итеүҙәрен күҙҙә тота, бының өсөн Италия территорияһындағы бөтә казармалар өҫтәмә рәүештә ҡоралдар менән тәьмин ителәләр. Планда шулай уҡ власте ҡулға алыу өсөн хәрби политик аппарат төҙөү күҙҙә тотола.

Государство аппаратын фашистарға ҡаршы элементтәрҙән таҙартыу буйынса сараларҙан һәм ойошмаларҙы финанс менән тәьмин итеү сараларынан башҡа, план шулай уҡ һайлауҙарҙы өҙөүҙе, айырым алғанда, һайлау участкаларында һәр төрлө ваҡиғалар килтереп тыуҙырыуға ҡоторторға тейеш булыусы агенттар алыуҙы күҙҙә тота. Был агенттарға, властар тәртипһеҙлектәр өсөн булған бөтә яуаплылыҡты «коммунистарға» йөкмәтә алһындар өсөн һәм осада хәлен индереүгә һылтау таба алһындар өсөн уларҙы, милли демократик фронт партияларында член булып тора, тип күрһәтеүсе ялған документтар биреләсәк.

Заговорсылар кәңәшмәһендә Ватикан менән элемтәлә тороу ту-

«НЫҠЛЫ ТЫНЫСЛЫҠ ӨСӨН, ХАЛЫҠ ДЕМОКРАТИЯҺЫ ӨСӨН» ГАЗЕТАҺЫНЫҢ 7-СЕ НОМЕРЫ БАҪЫЛЫП СЫҠТЫ

БЕЛГРАД, 1 апрель. (ТАСС). Бөгөн «Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн» газетаһының етенсе (10) номеры баҫылып сыҡты. Был номерҙа «Халыҡтарҙың Америка ҡоллоғона ҡаршы көрәше» тигән башмәҡәлә, «Империализмға ҡаршы демократия көстәренең тупланыуы өсөн!» тигән дөйөм исем аҫтында төрлө илдәрҙәге демократик көстәрҙең көрәштәре һәм уңыштары тураһында хәбәрҙәр, Г. Димитровтың «Болгария халҡының демократия һәм социализм өсөн көрәше» тигән темаға ватан фронтының икенсе конгресында һөйләгән докладды, партия хроникаһы, Свен Линдеруттың «Швеция империалистик ҡурҡыныс зонаһында» тигән мәҡәләһе, Климентиҫтың «Чехословакия профсоюздары халыҡ берҙәмлеген һаҡлауҙа» тигән мәҡәләһе, Пайеттең «Италия халыҡ демократик фронтының һығыуы» тигән мәҡәләһе баҫып сығарылды.

Номерҙа шулай уҡ Ю. Циранкевичтең 1948 йылдың 17 мартында ППС-тың Варшава советы ултырышында яһаған сығышынан өҙөктәр һәм «ППР һәм ППС яңы осорҙа» тигән дөйөм исем аҫтында В. Гомулканың мәҡәләләре, матбуғат күҙәтеү, И. Коплениттең «Австрия эшселәр синыфының берҙәмлеге өсөн» тигән мәҡәләһе, Д. Заславскийҙең «Диуана де Гасперийҙең моғжизаһе» тигән мәҡәләһе, Ян Маректең «Политик мәҡәләләре» һәм Д. Краминовтың «Мюнхендә хыянатсылыҡ һәм яңы мюнхенселәрҙең эҙләнеүҙәре» (Совет информбюроһының «Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән белешмәһе баҫып сығарылыуына ҡарата) тигән мәҡәләһе баҫып сығарылды.

АҠШ Төркиәне ҡоралландыра

НЬЮ-ЙОРК, 1 апрель. (ТАСС). Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһе Анкаранан, Төркиәнең связь министерствоһы вәкиленең белдереүенә ҡарағанда, «Маршалл планы» буйынса Төркиә хәрби-диңгеҙ флоты Американың бер авианосецен аласаҡ, тип хәбәр итә. Төркиә шулай уҡ Американан бер ни тиклем күләмдә самолеттар аласаҡ. Улар Төркиәгә 3 авианосецта килтереләсәктәр.

Хәбәрсе, АҠШ хәрби-һауа көстәренең офицеры алдағы аҙнала Төркиә аэродромдарынан ауыр бомбардировщиктар күтәрелә алалармы, юҡмы икәнлеген билдәләү маҡсатында, Төркиә аэродромдарына барасаҡ, тип өҫтәне.

БӨЙӨК ХАЛЫҠ СОБРАНИЕҺЫ СОВЕТ-БОЛГАРИЯ ДОГОВОРЫН РАТИФИКАЦИЯЛАНЫ

СОФИЯ, 1 апрель. (ТАСС). Бөгөн Бөйөк Халыҡ Собраниеһе президиумы Советтар Союзы менән Болгария Халыҡ Республикаһы араһындағы дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Мәскәүҙә 18 мартта ҡул ҡуйылған договорҙы ратификацияланы.

Яуаплы редактор урынбасары

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
№ 69
1948 йыл
6 апрель
шишәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Финляндия хөкүмәт делегацияһы хөрмәтенә В. М. Молотовта ҡабул итеү. (1-се бит).
СССР Верховный Советы Указына юғары урожай өсөн көрәшкә яңы еңеүҙәр менән яуап бирәйек! (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. И. Ниғмәтуллин. — Черниковск ҡалаһының партия активе йыйылышы.
Г. Хөснетдинов. — Отчет-һайлау йыйылышы ҡарарҙарын үтәү сараһын күрмәйҙәр. (2-се бит).
Иран менән Америка араһындағы хәрби килешеү тураһындағы мәсьәләгә ҡарата. (2-се бит).
Ҡытай хөкүмәтенең протесен кире ҡағыуға ҡарата. (2-се бит).
И. Болдогоев. — Тәрбиәсе ... ҡырҡа кәсәрергә. (3-сө бит).
Ужым сәсеүлектәренә — хәстәрлекле тәрбиә! (3-сө бит).
М. Ғәлиев. — Баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының эшен дөрөҫ ойошторорға. (3-сө бит).
КОЛХОЗ АУЫЛЫНАН ХАТТАР. Ғ. Әхмәтшин. — Сәсеү алдынан. (3-сө бит).
КИНО. Р. Хәйри. — «Совет Башҡортостаны». (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға ҡыйыу индерергә

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин ҡаҙа иткән ҙур эштәр программаһын — һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәү өсөн көрәштә [illegible] яңы хеҙмәт батырлыҡтары, һоҡланғыс яңы инициативалар [illegible]. Совет индустрияһы эшселәре, мастерҙары, инженерҙәре һәм технологтары хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү, производствоны, технологияларҙы дөрөҫ ойоштороу, экономия режимын һаҡлауға йүнәлтелгән гүзәл методтарҙы, ынтылыштары [illegible]. Шундай инициаторҙар — Василий Матросов, Александр Иванов, Николай Российский, Андрей Хохлин иптәштәрҙең исемдәре бөтә илебеҙгә билдәле.

Биш йыллыҡтың дүрт йылда үтәү өсөн Ленинград патриоттары тарафынан башланған социалистик ярыш бөтә халыҡ ярышына әүерелде. Предприятиеларҙа резервтарҙы табыу, [illegible] гүзәл башланғыс киң ҡолас ала барҙы.

Совет патриоттарының был гүзәл инициативалары Башҡортостан промышленносенең күп тармаҡтарында ла ҡыйыу ҡулланыла һәм алдынғы тәжрибәләрҙе производствоға индереүҙә эшләүселәр күренекле урын [illegible]. Элекке йылда ҡарағанда үткән йыл продукция эшләп сығарыуҙы 25,4 процентҡа арттырыуҙа, алты йәнҙән артыҡ предприятиеның пландарын арттырып үтәүендә, нефть сығарыу һәм эшкәртеү эшендә [illegible] металлургия промышленносендә яңылыҡ ынтылышлы алдынғы методтарҙы ҡулланыу ҙур роль уйнаны. Алдынғы тәжрибәләрҙе ҡыйыу кулланыу нәтижәһендә генә беҙ [illegible] «Металлолампа», «Автотрактородеталь» заводтары һәм тиҫтәләрсә башҡа предприятиеларҙың артта ҡалыу ҡиленән алдынғылар сафына сыҡтылар һәм биш йыллыҡтың өсөнсө йылында ла уңышлы эшләйҙәр.

Әгәр промышленностең бөтә тармаҡтарында һәм барлыҡ предприятиеларҙа ла ҡыйыу эш методтарын алдынғыларҙың күгиәреле ҡулланыуға ирешһәк, беҙ уңыштарыбыҙҙы тағы ла күберәк булыр ине. Үкенескә ҡаршы, күп урында был юҡ. [illegible] Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы республикабыҙҙа күп предприятиеларҙа алдынғы эш методтарын, техник үҙгәрештәрҙе производствоға индереү һис тә ҡанәғәтләнерлек түгел, тип күрһәтте.

Һәм фактылар шул турала һөйләйҙәр. Мәҫәлән, Черниковск машинаҙар төҙөү заводының алырға мөмкин. Был заводтың иптәш Большаков етәкселек иткән цехы үткән йыл уҡ производствоға оҙайлыҡ ағымлы—конвейер методын индереп, уның ҙур өҫтөнлөктәрен практикала иҫбат итте. Мастер Полещук Мәскәүгә барып, «Калибр» заводының күренекле мастеры Николай Российскийҙың эш тәжрибәһен өйрәнеп ҡайтты һәм иң алдағы [illegible] Башҡа цехтарҙа һәм участкаларҙа иптәш Большаков һәм Плешук иптәштәр өлгәһендә ойоштороуға тулы мөмкинлектәр бар. Ләкин завод етәкселәре Ферин, Толмачев иптәштәр был файҙалы методтарҙы бөтә коллективҡа индереүҙә инициатива күрһәтмәйҙәр.

Тиҙләтелгән метод менән бораулау мастерҙәре Балабанов, Куприянов, Алексеев, Бикбов, Кнутов иптәштәр исемдәре бөтә республикаға билдәле. Ләкин «Башнефть» берләшмәһендә лә, трестарҙа һәм бораулау конторалары да уларҙың тәжрибәһен бөтә бораулаусыларҙың да эшенә индереүҙә эшләмәйҙәр [illegible]. Роторға ҡарағанда өҫтөн булған турбиналы бораулауға күсеү, шулай уҡ станоктарҙы электр көсө менән эшләтеүгә күсеү юнәлешендә лә тейешле һөнәрлек юҡ.

Белорет металлургия заводында сталевар Хлесткин, Шарафетдинов иптәштәр үткән йыл тиҙләтелгән метод менән корос иретеү һарахотен башлап ебәргәниләр. Ләкин етәкселәр был ҡарамаҡта башында торманылар. Биш ай инде тиҙләтелгән метод менән корос иретеү булғаны юҡ. Ағымдағы йылдың тәүге кварталында комбинатта суйын, корос иретеү темпы бик нык түбәнәйҙе.

Тиҙләтелгән трестарында ла яңы эш методтары ҡулланыу эшендә күренекле уңыштар өлгәшеүселәр юҡ түгел. Черниковскиҙәге тиҙләтел трестының начальниге иптәш Блезнюк булған тиҙләтел монтаж контораһы торлаҡ йорттары һалыуҙа өлкәнбәр ағымлы методын индереп, эште ҡаты һәм заманға алып [illegible]. Октябрьск ҡалаһындағы бер тиҙләтел управлениеһы ер эштәрен механизациялау арҡаһында миллион һумдан артыҡ файҙа бирҙе. Үкенескә ҡаршы, тиҙләтел ойошмалары, бигерәк тә Октябрьск, Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларындағы тиҙләтел трестары был ҡыйыу методтарҙы ҡулланмайҙар. Бында хужалыҡ етәкселәре лә, инженер-техник работниктар ҙә, партия һәм профсоюз ойошмалары ла ғәйепле. Сөнки улар һәр бер яңылыҡтың, массалар инициативаһының башында тормайҙар.

Дәйәм алғанда республикабыҙ промышленносе яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планын үтәп етекремәйенсә. Тығыҙ ни алдында ҙур бурыстар булып ҡалды. Өҫтә үткән ике йылда эшләп еткерелмәгән продукция ҡалдыҡ ғына түгел, бәлки биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүҙе тәьмин итергә тейешбеҙ. Быны өсөн предприятиеларҙа һәм цехтарҙа күп кенә етәкселәребеҙҙе булған бер урында ҡатып ҡалыуҙы, инициативаһыҙлыҡты бөтөрергә, ынтылыҡты күрә һәм ҡулланыу беләргә, башланған файҙалы индустриализацияһы арттыуын еткерергә кәрәк. Ул тына ла түгел ике был тиклем булған гүзәл эш методтарын производствоға ҡыйыу индереү менән бер рәттән, промышленносте хеҙмәт етештереүсәнлеген тағын да торғаҙ яңы эш методтарын үйлап сығарыуҙы ойошторорға кәрәк.

Көндән-көн киң ҡолас алған социалистик ярыш массаларҙың ижади инициативаһын уяна, яңы гүзәл эш методтары барлыҡҡа килтереүсе көслө сығанаҡ булып тора. Хужалыҡ етәкселәре, партия, профсоюз ойошмалары масса инициативаһының башында торып ойоштороусы, беҙҙең алға ынтылышыбыҙға таҙартырға производствоға ҡыйыу индереүсе һәр бер яңы эш методтарын ҡулланыуға ярҙам итеүсе булырға тейештәр.

Финляндия хөкүмәт делегацияһы хөрмәтенә В. М. Молотовта ҡабул итеү

СССР Министрҙар Советы Председателе урынбаҫары һәм Сит илдәр Эштәре Министры В. М. Молотов 30 мартта Финляндия хөкүмәт делегацияһы хөрмәтенә ҡабул итеү яһаны.

Ҡабул итеүҙә Финляндия премьер-министры М. Пеккала һәм Финляндия хөкүмәт делегацияһының ағзалары, шулай уҡ Монголиядың, Болгарияның һәм Польшаның Мәскәүҙәге ғәҙәттән тыш илселәре һәм [illegible] ҡатнаштылар.

31 мартта Финляндияның СССР-ҙағы посланнигы К. Сундстрем әфәнде Финляндия хөкүмәт делегацияһы хөрмәтенә Финляндия миссияһында ҡабул итеү яһаны.

Ҡабул итеүҙә Советтар Союзы яғынан СССР Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов һәм башҡа рәсми кешеләр ҡатнаштылар. (ТАСС).

СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ УКАЗЫНА ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ӨСӨН КӨРӘШТӘ ЯҢЫ ЕҢЕҮҘӘР МЕНӘН ЯУАП БИРӘЙЕК!

Тағы ла яҡшыраҡ эшләйәсәкбеҙ

ДӘҮЛӘКӘН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Шәмбе көнө Дәүләкән МТС-ы усадьбаһында СССР Верховный Советы Президиумының БАССР ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы Указына арналған ҙур митинг булды. Митингыла МТС механизаторҙары, район етәкселәре ҡатнаштылар.

ВКП(б)-ның Дәүләкән район комитеты секретаре иптәш Маслеников тантаналы митингыны асып, СССР Верховный Советы Президиумының 2 апрель Указы менән Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелгән Дәүләкән МТС-ы директоры иптәш Ф. М. Павловты, МТС-тың өлкән агрономы иптәш Д. Л. Нестеровты, өлкән механик иптәш Н. Е. Тарасенконы һәм трактор бригадаһы бригадиры иптәш Т. Е. Алехинды ҡайнар рәүештә ҡотланы, шул уңай менән митингыла ҡатнашыусылар дүрт геройҙы хөрмәтләп көслө алҡышланылар.

—Үҙған йылда Дәүләкән МТС-ы колхоздары, — тине иптәш Маслеников, — 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алыуға ирештеләр. Был ҙур өлгәшеүҙәрҙе юғары баһалап, хөкүмәтебеҙ МТС-тың дүрт алдынғыһына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе. Указ МТС механизаторҙарын яңы еңеүҙәргә саҡыра.

Трибунаға МТС директорының политик эш буйынса урынбаҫары иптәш Әхмәдиев күтәрелде.

— Беҙ, — тине ул, — 1947 йылда 15 ат көслө һәр бер тракторға планда ҡаралған 700 гектар урынына — 869 гектар ер эшкәрттек һәм һәр гектарҙан 9 центнер урынына, 12-шәр центнерҙан артығыраҡ урожай алдыҡ. СССР Верховный Советы Президиумы Указы беҙҙе тағы ла күберәк иген етештерергә рухландыра. — Шулай уҡ митингыла сығып һөйләүсе рабочком председателе Смольченко, комбайнер Букин, слесарҙар Левин һәм Ефимов иптәштәр Бөтә Союз социалистик ярышта Дәүләкән МТС-ының 1948 йылда алдынғы сафта булыуы өсөн көрәшергә һүҙ бирҙеләр.

Социалистик Хеҙмәт Геройы Федор Максимович Павлов үҙ сығышында Совет Хөкүмәтенә, халҡыбыҙҙы яңы еңеүҙәргә рухландырыусы большевиктар партияһына, бөйөк Сталинға ҙур рәхмәт белдерҙе һәм МТС коллективы исеменән Указға яуап һүҙҙәрен һөйләне:

—Беҙҙең тракторҙарыбыҙ, ауыл хужалығы инвентарҙарыбыҙ яҙғы сәсеүгә әҙер. Комбайндарҙы ремонтлау эшен апрель айында тамамлайбыҙ. Алтай игенселәренең саҡырыуына яуап итеп беҙ 1948 йылда 15 ат көслө һәр тракторға 900-әр гектар ер эшкәртергә, һәр бер «Сталинец» комбайны менән 425 һәм «Коммунар» комбайны менән 300 гектар майҙандың урожайын йыйнарға һүҙ бирәйнек. Коллектив үҙ йөкләмәһен намыҫ менән үтәр, тип партиябыҙҙы һәм хөкүмәтебеҙҙе ышандырабыҙ.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Алехин, Тарасенко һәм Нестеров иптәштәр ҙә үҙ сығыштарында социалистик ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙә киләсәктә лә арымай-талмай эшләргә вәғәҙә иттеләр.

Иң аҙаҡ БАССР Ауыл хужалығы Министры урынбаҫары иптәш Комаров сығыш яһап, геройҙарҙы ҡотланы һәм МТС коллективын сталинса яңы биш йыллыҡ планды 1948 йылда үтәүгә саҡырҙы.

Ғ. Идрисов.

Геройҙың колхозында

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ. (Телефон аша). «Иҙел» колхозы члендәре шатлыҡлы көндәр кисерәләр. Бөтә колхозда, звеноларҙа һәм малсылыҡ фермаларында звеновод Банат Батыроваға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында һөйләйҙәр.

Радио аша был турала СССР Верховный Советы Президиумының Указын ишетеү менән уҡ колхозда күп кеше ҡатнашлығында митинг үткәрелде.

Йыйылышта беренсе булып һүҙ алыусы колхоз председателе иптәш Нафиков данлы звеновод Банат Батырованы юғары наградала алыуы менән ҡотлай.

— Звеновод Банат Батырованың еңеүе ул бөтә колхоздың еңеүе. Илебеҙҙең игенселәре һәм механизаторҙары тураһында көндәлек хәстәрлек күреүсе, уларҙың хеҙмәтен юғары баһалаусы хөкүмәтебеҙгә, партиябыҙға, бөйөк юлбашсыбыҙ Сталинға ҙур рәхмәт! Беҙ был хәстәрлеккә колхоз баҫыуҙарында, малсылыҡ фермаларында тағы ла яҡшыраҡ эшләү, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы яҙғы сәсеүен өлгөлө үткәреү менән яуап бирергә тейешбеҙ, — тине ул.

Унан һуң орлоҡсолоҡ звеноһы етәксеһе Фәрзәнә Хөсәинова һүҙ ала:

— Банат Батырованың шәкәр сөгөлдөрөнән юғары урожай алыу өсөн нисек көрәшеүен, күп хеҙмәт һалыуын беҙ бөтәбеҙ ҙә яҡшы беләбеҙ. Ул үҙенең звено члендәре менән үҙ участкаһында арыу-талыуҙы белмәй эшләй. Бөтә звеноларҙа ла эште Банат Батырова кеүек ойошторорға тейешбеҙ. Мин етәкселек иткән звено үҙған йыл бойҙайҙың һәр бер гектарынан 17-шәр центнер урожай алды. Ә эште ойоштора белгәндә, тағы ла юғарыраҡ урожай алырға мөмкин ине. Беҙҙең звено члендәре быйыл 14 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 25-әр центнер, 17 гектар майҙандағы арыштың һәр бер гектарынан 27-шәр центнер урожай алырға һүҙ бирҙеләр. Был эштә беҙ юғары урожай мастеры иптәш Банат Батырованан күп нәмәгә өйрәнәсәкбеҙ.

Социалистик Хеҙмәт Геройы звеновод Банат Батырова үҙенең сығышында:

— Ябай игенсе тураһында былай ҙур хәстәрлектең бары тик беҙҙең илдә генә булыуы мөмкин. Бына мин сөгөлдөр үҫтереүсе башҡорт ҡатыны хөкүмәт тарафынан Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алдым. Минең көүектәр беҙҙең илдә күптәр һәм бөтә колхозсылар ҙа минең кеүек һәм минең звено члендәре кеүек эшләй алалар. Беҙ тағы ла яҡшыраҡ эшләй алабыҙ һәм эшләргә тейешбеҙ. Үҙған йыл беҙҙең звено 2 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 611,5-әр центнер шәкәр сөгөлдөрө алһа, быйыл беҙ һәр гектарҙан 700-шәр центнер шәкәр сөгөлдөрө, ә звеноға беркетелгән 15 гектар бойҙайҙың һәр бер гектарынан 18-әр центнер урожай алырға һүҙ бирәбеҙ, — тине.

М. Ғимадиев.

Алдынғылар көүек эшләргә йөкләмә алалар

ЯҢАУЫЛ. (Телефон аша). Райондың колхозсылары һәм МТС работниктары Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указын ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар.

«Восток» ауыл хужалығы артелендә ошо айҡанлы үткәрелгән йыйылышта сығыш яһаусы звеноводтарҙан Шәрипов һәм Талипов иптәштәр Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының бай тәжрибәләрен өйрәнеп, быйыл үҙҙәренә беркетелгән участкала бойҙайҙың һәр бер гектарынан 25-шәр центнер урожай үҫтереп алырға, иртә культуралар сәсеүҙе 7 эш көнөндә, ә һуңғы культуралар сәсеүҙе 5 көндә тамамларға һүҙ бирҙеләр.

— Яҙғы көн — йыл туйҙыра, ти халыҡ мәҡәле. Был бик дөрөҫ. Сәсеүҙе бер ике көнгә һуңлатыуҙа бик күп урожайҙы юғалтыуға килтерәсәк. Сәсеүҙең ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәрелеүе һәр бер колхозсының намыҫлы эшләүенә бәйләнгән. Мин тырмала көндәлек эш нормамды кәмендә 150 процентҡа үтәргә һүҙ бирәм һәм бөтә тырмасыларҙы, һабансыларҙы үҙем менән ярышҡа саҡырам, — тине колхозсы иптәш Мөғәлимов.

Колхоз үҙған йыл бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан 15-шәр центнер урожай алған булһа, мөмкинлектәрҙе тағы ла бер тапҡыр ныҡлап тикшереп сыҡҡандан һуң, быйыл бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 20-шәр центнер урожай алырға ҡарар ителде. Колхозсылар бөтә сәсеү майҙанына етерлек яҡшы сифатлы орлоҡ тупланылар һәм күрше колхоздарға 58 центнер бойҙай орлоғо биреп ярҙам иттеләр.

Быйыл яҙ 59 гектар майҙанда ужым сәсеүлегә өҫтәмә аҙыҡландырыласаҡ, 280 гектар майҙан тырматыласаҡ. Быны өсөн етерлек ашламалар һәм инвентарҙар әҙерләнде.

Колхозсылар, эш аттарын бары тик баҫыу эштәрендә генә файҙаланыу маҡсаты менән, орлоҡ ташыу һәм башҡа сиел эштәргә егеү өсөн үҙҙәренең һыйырҙарын эшкә өйрәтәләр.

«Яҡс» ауыл хужалығы артелендә лә күп кеше ҡатнашлығында йыйылыш булып үтте. Үҙған йыл 21 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алыуға өлгәшкән баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Искәндәров быйыл республикабыҙҙың юғары урожай мастерҙары өлгөһендә эшләп, һәр бер гектарҙан 35-шәр центнер урожай алырға һүҙ бирҙе һәм бөтә колхозсыларҙы стахановсы эшкә саҡырҙы.

М. Фатихов.

Сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәрәсәкбеҙ

Беҙ яҙғы сәсеүгә әҙерлекте үҙған йылғы хужалыҡ эштәре тамамланыу менән, көҙҙән үк башлағайныҡ. Коллектив был эштә ҙур ойошҡанлыҡ һәм берҙәмлек күрһәтте. Беренсе февралгә сәсеүгә әҙерлек эштәрен тулыһынса тамамланыҡ. Ремонтланған бөтә тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар государство комиссияһы тарафынан тикшерелеп ҡабул ителделәр. Тракторсыларҙан Лиманов, Батюшев, Федоров, токарь Баженов иптәштәр ремонтта стахановсы эш өлгөләре күрһәттеләр.

Иптәш Осипов етәкселек иткән өсөнсө ферма сәсеүгә әҙерлекте, башҡа фермаларға ҡарағанда, күп алда тамамланы.

Алтай крайы игенселәренең саҡырыуына яуап итеп, совхоз коллективы быйыл бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан уртаса 12-шәр центнер урожай үҫтереп алырға йөкләмә алды. Ошо бурысты уңышлы хәл итеү өсөн ҡыҫҡа осорҙа агротехник саралар планын үтәүгә ныҡлы иғтибар бирҙек. Ужым сәсеүлектәрендә һәм туңға һөрөп ҡалдырылған ерҙәрҙә ҡар тотоу үткәрҙек. Тамыр аҙыҡтар сәселәсәк һәм картуф ултыртыласаҡ майҙанға 1580 тонна тирес сығарҙыҡ. Яҙ көнө ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрәсәкбеҙ. Быны өсөн хәҙер тирес шыйыҡсаһы һәм башҡа төр ашламалар әҙерләйбеҙ.

Партия ойошмаһы сәсеү осоронда баҫыуҙа агитацион-массовый эш алып барыу өсөн айырым план төҙөнө. Бригадаларға, звеноларға агитаторҙар билдәләнде. Бөтә бригадаларҙа ла «Боевой листоктар» сығарыласаҡ.

Беҙ һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йыл яҙғы сәсеүен ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреп, юғары урожай алыуға ныҡлы нигеҙ һаласаҡбыҙ.

В. Ниғмәтуллин,
Байрамғол ит-һөтсөлөк совхозы партия ойошмаһы секретаре.

«Туймазанефть» тресының иң яҡшы стахановсы бораулаусыһы, комсомолец иптәш Николай Рябов нормаһын 200 процентҡа еткереп үтәй. Ул йәш нефтселәрҙең республикан кәңәшмәһенә делегат.

Һүрәттә: иптәш Н. Рябов вышкаһы янында.

Ғ. Әмиров фотоһы.

Стахановсы вахтаға баҫтылар

Белорет ҡорос-сыбыҡ канат заводы коллективы Беренсе май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫты. Заводтың алдынғы тянульщиктарынан Шипилов, Акимов һәм Казанцев иптәштәр март айы планын бер ярым тапҡырға үтәгәйнеләр. Улар апрель айының тәүге көндәрендә лә ритмлы эшләйҙәр.

Иптәш Исламов етәкселек иткән 2-се номерлы цехтың комсомолец-йәштәр бригадаһы заводта алдынғы. Был бригада һәр көнгә норманы 200 процентҡа еткереп үтәй.

—☆—

Демобилизацияланып ҡайталар

Башҡортостандың батыр улдары Совет Армияһы сафынан демобилизацияланып, тыныс хеҙмәт фронтына ҡайталар. Улар араһында Совет Армияһы сафында яңы специальностар алған шоферҙар, трактористар, механиктар, мотористар, связистар һәм башҡа төрлө профессиялылар бар. Мәҫәлән, армияға киткән ваҡытта бер төрлө лә специальносе булмаған Өфөлө сержант Владимир Григорьевич Наруков механик булып ҡайтҡан, рядовой Владимир Петрович Турбин телеграфист профессияһына өйрәнгән, Алексей Иванович Сазонов электросварщик профессияһын алған. Был иптәштәр ҡайтыу менән Киров райвоенкоматына барып, үҙҙәренең яңы специальносе буйынса эшләйәсәктәрен белдерҙеләр.

Райвоенкоматтар Совет Армияһы сафынан ҡайтыусыларҙы эшкә урынлаштырыуға ярҙам күрһәтәләр.

—☆—

Яҙғы сәсеү осоронда

Республиканың байтаҡ учреждениелары яҙғы сәсеү осоронда колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереүгә әҙерлек алып баралар.

Быйыл яҙғы сәсеү ваҡытында колхоздарҙа, совхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм район үҙәктәрендә 250 киноустановка эшләйәсәк. Бында «Совет Башҡортостаны» тигән һәм ауыл хужалығы алдынғыларына арналған башҡа күп кенә кинокартиналар күрһәтеләсәк.

Башгосфилармония 6 культбригада төҙөй. Был бригадалар 40 районды, рус драма театры Әлшәй, Өфө, Дәүләкән райондарын, Стәрлетамаҡ һәм Белорет театрҙары үҙ тирәһендәге райондарҙы хеҙмәтләндерәсәктәр.

Культура-ағартыу учреждениелары управлениеһе «библиотека-автомобиль» ойошторҙо. Был «библиотека-автомобиль» Ауырғазы, Ҡырмыҫҡалы, Бөзәй, Благовещен — бөтәһе 15 районда буласаҡ. Был махсус автомобилдә 3 мең дана китап була.

Һаулыҡ һаҡлау Министрствоһы баҫыу стандары өсөн райондарға бер нисә мең дана «колхоз аптечкаһы» ебәрҙе. Сәсеү ваҡытында күп кенә врачтар һәм фельдшерҙар ауылдарға профилактика эштәре алып барасаҡтар.

Партия тормошо

Черниковск ҡалаһының партия активе йыйылышы

Ошо көндәрҙә Черниковск ҡалаһының партия активе йыйылышы булып үтте. Ҡала комитете секретаре иптәш Пацурия ВКП(б)-ның XXI өлкә конференцияһының йомғаҡтары тураһында доклад яһаны. Конференция тарафынан ҡуйылған боевой бурыстарға туҡталып, докладсы, ҡала промышленность предприятиеларының эштәренә характеристика биреп китте.

— Дөйөм алғанда, — ти иптәш Пацурия, — ҡала предприятиелары буйынса беренсе квартал планы арттырылып үтәлде. Шырпы фабрикаһы, нефть эшкәртеү, химия заводтары, фанера комбинаты һәм машиналар төҙөү заводының хәл иткес цехтары өс айлыҡ пландарын 20—25 мартта уҡ үтәнеләр. Ләкин төҙөлөш тресы һәм лампалар эшләү заводы квартал планын үтәүҙе тәьмин итә алманылар. Был ошо предприятиеларҙа эшселәр араһында политик тәрбиә эштәренең насар ойошторолоуының һөҙөмтәләре булып тора.

Иптәш Пацурия активте идеологик тәрбиә эштәрен партияның өлкә конференцияһы талаптарына ярашлы итеп көсәйтергә һәм биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә массаны мобилизовать итергә саҡырҙы.

Доклад буйынса 10 кеше сығыш яһаны.

— Кадрҙарҙы идеологик яҡтан тәрбиәләү өлкәһендә, — ти машиналар төҙөү заводының партком секретарының урынбаҫары иптәш Беляев, — завод партия ойошмаһы ҡайһы бер уңыштарға өлгәште. Эшселәр араһында хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт көсәйҙе. Быһың практик һөҙөмтәһен беҙ күреп торабыҙ. Коллектив беренсе квартал планын срогынан алда тулыһы менән, ә ауыл хужалығы машиналарына запас частар етештереү заданиеһын 121 процентҡа үтәне.

— Өлгәшелгән был уңыштарҙы, — ти ул, — артабан арттыра барыу өсөн цех партия ойошмалары политик-массовый эштәрҙе тағы ла яҡшыраҡ ойошторорға тейештәр.

— Кадрҙарҙың техник белемен күтәреүҙә, — ти химия заводының баш инженеры иптәш Грячановский, — техник конференцияларҙы даими рәүештә ойоштороуҙың әһәмиәте ҙур. Был эш менән мин коллективта үҙем етәкселек итәм. Техник конференцияла инженер-техник работниктар технологик процестарҙы камиллаштырыу тураһында тәҡдимдәр индерәләр, үҙҙәренең тәжрибәләре буйынса фекер алышалар. Был хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә ныҡ ярҙам итә. Кадрҙарҙың техник белемдәрен күтәреү һәм эшселәр араһында политик-массовый эште киң йәйелдереү нигеҙендә завод квартал планын 110 процентҡа үтәне.

Машиналар төҙөү заводының производство бүлеге начальнигы иптәш Пономарчук ВКП(б) ҡала комитетының үҙ ҡарарҙарының үтәлешен тикшереү эшенә әһәмиәт бирмәүен ныҡ тәнҡитләне.

— ВКП(б)-ның ҡала комитете, — тине иптәш Пономарчук, — төҙөлөш тресының эшен яҡшыртыу тураһында байтаҡ ҡарарҙар сығарҙы. Ләкин ул үҙ ҡарарының үтәлешен тикшермәүе арҡаһында төҙөлөш тресы планын йылдан-йыл үтәмәй килә, бигерәк тә торлаҡ йорттарын төҙөүҙә әҙә. Ҡала комитете етәкселәренә үҙҙәре сығарған ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереп, төҙөлөш етәкселәренән конкрет эш талап итергә ваҡыт инде.

Йыйылыш ВКП(б)-ның XXI өлкә конференцияһы ҡарарҙарын үтәүгә коммунистарҙы мобилизовать итеүгә йүнәлтелгән ҡарар ҡабул итте.

И. Ниғмәтуллин.

Партия ойошмалары секретарҙарына ярҙам

Башҡаланың Жданов районындағы тәүге партия ойошмаларында отчет-һайлау осоронда яңы составтарға әлегә тиклем партия эшендә етерлек тәжрибәләре булмаған коммунистар күп кенә һайланғайны.

ВКП(б)-ның Жданов район комитете партия эшенә үрләтелгән йәш кадрҙарҙың партия-ойоштороу, партия-эске эштәр буйынса белемдәрен күтәреүҙә эшлекле саралар күреүҙе планлаштырҙы һәм конкрет эшкә башланы. Район партия комитете 31 мартта «Партия хужалығын нисек алып барырға» тигән темала семинар үткәрҙе. Предприятиеларҙың, учреждениеларҙың партия ойошмалары секретарҙарынан һәм уларҙың ярҙамсыларынан семинарҙа 108 кеше ҡатнашты.

ВКП(б) Өлкә Комитете работнигы иптәш Балашов был мәсьәлә буйынса лекция уҡыны. Ул лекцияһында партия хужалығын дөрөҫ алып барыуҙың әһәмиәте, был мәсьәлә буйынса ВКП(б) Үҙәк Комитетының талаптары тураһында ентекләп туҡталды. Шуның менән бергә, иптәш Балашов был эш өлкәһендә тәүге партия ойошмаларының практик эштәрендәге етешһеҙлектәрҙән миҫалдар килтерҙе һәм уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәтте.

Семинарҙа ҡатнашыусылар лекциянан һуң аңлашылып етмәгән мәсьәләләр буйынса фекер алыштылар һәм бик күп һанда һорауҙар бирҙеләр.

Партияның Жданов район комитете «Партия йыйылыштарын нисек әҙерләргә һәм нисек үткәрергә» тигән темала яҡын көндәрҙә ошондай уҡ семинар үткәрәсәк.

Отчет-һайлау йыйылышы ҡарарҙарын үтәү сараһын күрмәйҙәр

Байыш МТС-ы тәүге партия ойошмаһының отчет-һайлау йыйылышы коммунистарҙы идея-политик яҡтан тәрбиәләүҙе яҡшыртыуға һәм дирекцияның хужалыҡ эшмәкәрлегенә контролде көсәйтеүгә йүнәлдерелгән конкрет ҡарарҙар ҡабул иткәйне. Был йыйылыш үткәнгә хәҙер ике ай булды. Ләкин партия ойошмаһы секретаре иптәш Ғәлиев ул ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу буйынса һис бер төрлө эш ойошторғаны юҡ.

Коммунистар партия ойошмаһы ҡаршыһында төҙөлгән политик мәктәптең һәм иптәш Сталин биографияһын өйрәнеү түңәрәгенең насар эшләүҙәрен йыйылышта ныҡ тәнҡитләп, уларҙа занятиеларҙы регуляр рәүештә үткәрергә наказ биргәйнеләр. Ә был түңәрәктә һәм политик мәктәптә отчет-һайлау йыйылышынан һуң бер генә занятие лә үткәрелгәне юҡ.

Коммунистарҙы политик яҡтан тәрбиәләү эшенә иғтибар бирмәү һөҙөмтәһендә ВКП(б) членылығына кандидаттарҙың күбеһенең кандидатлыҡ стаж сроктары күптән үк инде үтеп киткән. Насретдинов, Ҡашапов, Ғәделшин, Мостафин иптәштәр 1943—1946 йылдарҙан бирле партия членылығына кандидат булып йөрөйҙәр. Уларҙың политик белемдәрен күтәреү һәм шулай уҡ уларҙы партия эшенә йәлеп итеү саралары күрелмәй.

Администрация эшенә партия контроленең йомшаҡ булыуы шуға килтерҙе — МТС әле булһа яҙғы баҫыу эштәренә әҙер түгел. МТС дирекцияһы, тракторҙар ремонтлау планы үтәлде, тип Дүртөйлө районы етәкселәренә сводка биргән булһа ла, унда әле 4 трактор бөтөнләй ремонтланмаған. Хатта уларҙы ремонтлау өсөн кәрәкле запас частар ҙа юҡ. Шулай уҡ, план буйынса 33 һабан урынына 26 һәм 21 сәскес урынына ни бары 12 генә сәскес ремонтланған. МТС яҙғы сәсеү ваҡытына ягыулыҡ менән бары 41 процентҡа ғына тәьмин ителгән. Шулай итеп МТС яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән ҡаршылауҙан бик алыҫ тора. Был хәл партия ойошмаһы секретаре иптәш Ғәлиевте бер ҙә борсомай.

Г. Хәснетдинов.

Теоретик конференция

Ошо көндәрҙә Октябрьск ҡалаһының беренсе номерле бораулау контораһы партия ойошмаһы «Социализмдан әҡрынлап коммунизмға күсеү» тигән темаға теоретик конференция үткәрҙе.

Конференцияла эшсе, хеҙмәткәрҙәрҙән, инженер-техник работниктарҙан 200 кеше ҡатнашты. Докладсы һәм сығыш яһаусылар ныҡлы әҙерләнгәнлектәрен күрһәттеләр.

Район партия мәктәбе эшен тамамланы

ВКП(б)-ның Белорет район комитете янында ойошторолған район партия мәктәбе үҙенең эшен тамамланы. Партия мәктәбен тамамлаусы 18 кешенең 17-һе һынауҙарҙы «яҡшы» билдәһенә тапшырҙы.

Уҡыусылар программа материалдарынан тыш күп кенә темаларға докладтар, лекциялар тыңланылар. Партия мәктәбе коммунистарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреү эшендә ҙур роль уйнаны.

М. Ирғәлин.

Тәүге партия ойошмаһы секретарҙарының семинары

ВКП(б)-ның Бишбүләк район комитете тәүге партия ойошмаһы секретарҙарының өс көнлөк семинарын үткәрҙе.

Семинарҙа социализмдан әҡрынлап коммунизмға күсеү, кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү, партия-политик һәм партия-ойоштороу эштәренең ҡуйылышы, комсомолға партия ойошмаларының етәкселеге тураһында лекциялар уҡылды һәм тәжрибә уртаҡлашыу тәртибендә күп кенә практик мәсьәләләр тикшерелде.

Г. Петров.

МАСТЕР—АГИТАТОР

Биргәли Шәйхисламов оҙаҡ ваҡыттар рудник базаһында мөдирлек вазифаһын үтәне. Шәйхисламовтың ҡаршаған һаулығы өсөн был бик лайыҡлы эш ине. Ләкин уның күңеле тынысһыҙланды. Рудниктең производство планы үтәлеше менән эш бик насар бара, хурлыҡлы әҙәклектән сыға алмай. Уның сәбәбе кешеләр араһында массовый-политик эш алып барыуға бәйләнгән. Быһың өсөн беренсе нәүбәттә партия ойошмаһы, бына Шәйхисламов кеүек коммунистар ғәйеплеләр. Шәйхисламов үҙенең был оҙаҡлыҡҡа ҡарата мөнәсәбәтен бына ошолай билдәләне. Ысынлап та, план өсөн туранан-тура көрәш барған урында, коммунистар юҡ тиерлек һанда аҙҙар. Шунлыҡтан, массаны үҙҙәре артынан эйәртеп алып китә алмайҙар.

Коммунист Шәйхисламов байтаҡ һынауҙар үткән кеше. Ул шахтаға кире ҡайтырға ҡарар итте. Уның теләгенә ҡаршы килмәнеләр. Шәйхисламовты иң артта барыусы агрегаттарҙың береһенә мастер итеп ҡуйҙылар.

Сменаның насар эшләүе, уның эсендә хеҙмәт дисциплинаһының сиктән тыш йомшаҡ булыуынан, кешеләрҙең үҙ эштәрендә яуаплыһыҙлыҡ күрһәтеүҙәренән килә ине. Шуға күрә, беренсе нәүбәттә, кешеләрҙе аңлы, актив көрәшкә күтәрергә кәрәк булды. Мастер үҙенең вазифаһын йыш ҡына политик беседалар үткәреүҙән башлап алып китте, актуаль темаларға әҙерлекле, эшлекле беседалар үткәрҙе. Һәр көн һәйын тиерлек смена алдынан биш минутлыҡ ораштыуҙар ойоштороҙо. Ошондай беседаларҙың береһендә сменала иң насар эшләүсе Яхина Зәкиәнең ҡылыҡтары тикшерелде. Яхина үҙ эшенә һалҡын ҡарай, ә күберәк иптәштәренә һалышa ине. Уның яуапһыҙлығы арҡаһында руда ташыусы вагонеткалар йыш ҡына буш торалар. Был бөтә сменаға тотҡарлыҡ яһай. Шәйхисламов был фактыны көндөң политик мәсьәләләренә бәйләп, төрән, аҡыллы һығымта яһаны. Сәлихова Мәфүрә, Икрамова Наилә кеүек насар эшләп килеүселәр ҙа бындай беседаларҙа йыш ҡына телгә алыналар.

Бынан тыш, Шәйхисламовтың инициативаһы менән, цех күләмендә регуляр рәүештә стена газетаһы сығарыла башланы. Стена газетаһы производство планы өсөн көрәштә үткер ҡорал ролен үтәне.

Күп көс һалынған намыҫлы хеҙмәт мастер-агитаторға күңелле һөҙөмтәләр килтерҙе. Шәйхисламов сменаһы дробилка цехында өсөнсө ай инде беренсе урында бара. Ғинуар айы планы 186 процентҡа үтәлһә, февраль айында план үтәлеше 190 процентҡа етте. Коммунист Шәйхисламов үҙ сменаһында хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреүгә бына шулай өлгәште.

М. Хәйҙаров.

Учалы районы.

Иран менән Америка араһындағы хәрби килешеү тураһындағы мәсьәләгә ҡарата

Билдәле булғанынса, СССР-ҙың Ирандағы посолы И. В. Садчиков, Совет Хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса, 31 ғинуарҙа Иран менән Америка араһындағы 1947 йыл 6 ноябрь хәрби килешеүенә ҡарата Иран хөкүмәтенә нота тапшырғайны. Нотала шулай уҡ Америка хәрби советниктарының Иран территорияһын АҠШ-тың хәрби-стратегик базаһына әйләндереүгә йүнәлтелгән эштәре тураһында күп кенә фактылар килтерелде.

Иран хөкүмәте үҙенең 4 февралда яҙған яуабында бөтә килешеүҙе армияның санитар хеҙмәт интендантствоһы кеүек административ мәсьәләләр буйынса консультацияларға ҡайтарып ҡалдырырға тырышып, Совет Хөкүмәтенең юғарыла күрһәтелгән нотаһында яҙылған фактыларҙы кире ҡағырға маташты. Иран хөкүмәте шулай уҡ, Ирандың бөтә территорияһында, казармаларҙы ла инһереп, Американың бер генә һалдаты ла юҡ, тип раҫлап Америка офицерҙарының Иран армияһы менән етәкселек иткәнлектәрен кире ҡаҡты. Шуның менән бергә, Иран хөкүмәтенең ошо күрһәтелгән нотаһында Ирандағы совет хеҙмәткәрҙәренә ҡарата бөтөнләй нигеҙлекһеҙ ғәйепләүҙәр бар. Улар, имеш, Ирандағы «авантюристик элементтарға» ярҙам күрһәтеүҙә һәм уларға юл ҡуйыуҙа, шулай уҡ Иран Азербайжанындағы ваҡиғаларға ҙур иғтибар менән ҡарауҙа ғәйепләнәләр.

Советтар Союзының Ирандағы посолы 24 мартта Иран премьер-министрына нота тапшырҙы. Был нотала, Совет Хөкүмәте Иран хөкүмәтенең, Американың хәрби советниктары йәнәһе Иран армияһында етәксе постарҙа тормайҙар, һәм, имеш, уларға хәрби министерствоның һәм башҡа хәрби учреждениеларҙың эштәренә инер өсөн бер ниндәй ҙә хоҡуҡ бирелмәгән, тип яһаған белдереүен ҡәнәғәтләнерлек тип таный алмауы тураһында күрһәтелә. Иран менән Америка араһында 1947 йылдың 6 октябрендә төҙөлгән һәм Америка хәрби миссияһының маҡсаты «Иран хәрби министерствоһы менән һәм Иран армияһының составы менән Иран армияһының хәрби һәләтлелеген арттырыу өсөн хеҙмәттәшлек итеү» тора, тип күҙҙә тотоусы килешеүҙән булһын, шулай уҡ Совет Хөкүмәтенең 31 ғинуар нотаһында килтерелгән һәм Америка хәрби советниктарының Иран армияһында етәксе роль тотҡанлыҡтарын раҫлаусы фактыларҙан да был белдереүҙәрҙең нигеҙлекһеҙ икәнлеге күренеп тора.

Американың Ирандағы хәрби советниктарының эштәренә ҡарата Совет Хөкүмәтенең 31 ғинуар нотаһында яҙылған фактыларҙы Иран хөкүмәтенең танарға маташыуы айҡанлы Совет Хөкүмәте, 1941 йылда Иран хөкүмәтенең шулай уҡ Ирандағы сит ил вәкилдәренең Советтар Союзына ҡаршы йүнәлтелгән эштәрен, был эштең бөтә кешегә билдәле булыуына ҡарамаҫтан, танарға маташҡанлығын күрһәтмәйенсә үтә алмай.

«Америка хөкүмәтенә һис бер ваҡытта ла Америка чиновниктары тарафынан етәксе постарҙы биләү өсөн монополиялы хоҡуҡ бирелмәне», тип Иран хөкүмәтенең раҫлауы ла ысынбарлыҡҡа ярашлы түгел. Иран хөкүмәтенең был раҫлауы юғарыла күрһәтелгән килешеүҙең 24-се статьяһына ҡапма-ҡаршы булып тора. Бында былай тип әйтелә: «Ошо килешеүҙең ғәмәлдә булыуы осоронда, йәки ул оҙайтылған ваҡытта, Иран хөкүмәте, АҠШ хөкүмәте һәм Иран хөкүмәте араһында килешеүгә өлгәшмәй тороп, Иран армияһы менән бәйләнешле булған ниндәй ҙә булһа вазифаларҙы үтәү өсөн ниндәй ҙә булһа башҡа сит ил хөкүмәтендә хеҙмәт итеүсе бер ниндәй ҙә кешеләрҙе хеҙмәткә алмаясаҡ». Был статьянан күренгәнсә, Иран менән Америка араһында 1947 йылдың 6 октябрендә төҙөлгән килешеү АҠШ-тан башҡа илдәрҙең хәрби хеҙмәткәрҙәре өсөн Иран армияһындағы етәксе постарҙы биләү мөмкинлеген бөтөрмәй генә түгел, бәлки уларҙың, АҠШ хөкүмәтенең ризалығынан башҡа, Иран армияһына хеҙмәткә инеү мөмкинлегенән дә ғөмүмән мәхрүм итә.

Совет Хөкүмәте, Иран хөкүмәтенең, имеш, совет вәкилдәре Иран Азербайжанындағы ваҡиғаларға ҙур иғтибар менән ҡарауҙары тураһындағы белдереүен уҫал уй менән уйлап сығарылған ялған, тип белдерә. Быларҙың сәбәбе ысынлап та Иран хөкүмәтенең үҙенең эске политикаһында.

Үҙҙәренең демократик фекерҙә булыуҙары өсөн һәм демократия, прогресс эшен яҡлауҙары өсөн Иран хөкүмәте тарафынан Ирандың эҙәрләнеүсе граждандарына Совет Хөкүмәтенең йәшәү урыны биреүе тураһындағы мәсьәләгә килгәндә, Совет Хөкүмәте Иран хөкүмәтенең ошо йәһәттән булған дәғүәләрен һис бер ниндәй нигеҙлекһеҙ, тип белдерә. Хеҙмәтсәндәрҙең интерестарын яҡлауҙары өсөн, йәки фәнни деятельность, йәки милли-азатлыҡ көрәше өсөн эҙәрләнеүсе сит ил граждандарына йәшәү урыны биреү хоҡуғы СССР Конституцияһында ҡаралған һәм был шуға ярашлы рәүештә Советтар Союзы тарафынан еренә еткерелә.

Иран хөкүмәтенең, имеш, Ирандың СССР-ҙағы эмигранттарына Иран территорияһына баҫып инеү өсөн отрядтар формировать итергә рөхсәт ителә, тигән раҫлауы һәм, имеш, Советтар Союзы территорияһында «Иран политэмигранттарының йәшерен радио станцияһы бар», тигән раҫлауы ла провокацион характерҙағы ялғандар иҫәбенә инә. Имеш Советтар Союзы ғәскәрҙәренең сик буйындағы пункттарында үткәрелә торған совет хәрби частарын бер урындан икенсе урынға күсереү һәм ниндәйҙер манёврҙар тураһындағы белдереүҙәр ҙә ошондай уҡ нигеҙһеҙ характерҙалар.

Совет Хөкүмәтенең 31 ғинуарҙа яҙған һәм Иран менән Америка араһындағы 1947 йылдың 6 октябрендә төҙөлгән килешеүҙең яҡшы күршелек мөнәсәбәттәре менән уртаҡ бер генә нәмәһе лә юҡ, тип күрһәтелгән нотаһын Ирандың эске эштәренә тығылыу тип күрһәтергә маташыуын Иран хөкүмәте тарафынан үткәрелә торған һәм Советтар Союзы менән Иран араһындағы 1921 йыл 26 февраль договорында кәүҙәләндерелгән яҡшы күршелек мөнәсәбәттәре тураһындағы положениеларға ҡапма-ҡаршы йүнәлтелгән политика өсөн яуаплылыҡтан баш тартырға тырышыу тип ҡарауҙан башҡаса ҡарап булмай.

(ТАСС).

Ҡытай хөкүмәтенең протесен кире ҡағыуға ҡарата

Әлегә тиклем хәбәр ителгәненсә, Ҡытай властары тарафынан яллап файҙаланыла торған «С—46» тибындағы самолетҡа, хәрби-диңгеҙ базаһы Порт-Артур районы өҫтөнән осоп киткән сағында, имеш, 8 мартта Советтар Союзының ике самолетының ут асыуҙарына ҡарата Ҡытай Хөкүмәтенең Ҡытай сит ил эштәре министерствоһы тарафынан 10 мартта белдерелгән протесе 13 мартта Советтар Союзының Нанкиндағы Посольствоһының нотаһы тарафынан кире ҡағылғайны.

18 мартта Советтар Союзының Нанкиндағы Посольствоһы ошо ваҡиғаға ҡарата Ҡытай сит ил эштәре министерствоһынан яңы нота алды. Был нотала, күрһәтелгән самолет, имеш, хәрби-диңгеҙ базаһы Порт-Артурҙың сиген аша сыҡманы, тип күрһәтелә. Нотала шулай уҡ, Ҡытай Порт-Артур хәрби-диңгеҙ базаһын да индереп, Маньчжурияның бөтә территорияһына ҡарата тулы суверенный хоҡуҡтар менән файҙалана һәм шуға күрә Ҡытай самолеттары Маньчжурияның теләһә ҡайһы районында иркле осорға хоҡуҡлылар, тип әйтелә.

3 апрелдә Советтар Союзының Нанкиндағы Посольствоһы яуап нотаһы ебәрҙе. Был нотала яңынан, Ҡытай сит ил эштәре министерствоһының 10 марттағы нотаһында күрһәтелгән координаттар ысынбарлыҡҡа ярашлы түгелдәр, тип күрһәтелә. Күрһәтелгән самолет хәрби-диңгеҙ базаһы районының сиктәрен аша сыҡманы һәм был район эсендә булманы, тип раҫлауҙар ҙа шулай уҡ ысынбарлыҡҡа ярашлы түгелдәр. Әле уның тураһында һүҙ бара торған самолет Советтар Союзының ике һаҡсы самолеты тарафынан хәрби-диңгеҙ базаһы районында 17 сәғәт 54 минутта 39 градус 03 минут төньяҡ киңлектә һәм 121 градус 06 минут көнсығыш оҙонлоҡ нөктәһендә күрелде. 17 сәғәт 58 минутта самолет 38 градус 51 минут төньяҡ киңлек һәм 121 градус 03 минут көньяҡ-көнсығыш оҙонлоҡ нөктәһендә, шулай уҡ база районында булған. Советтар Союзының ике һаҡсы самолеты ошо юғарыла күрһәтелгән самолет артынан уны күргән урындан алып бер нисә минут буйынса уның артынан барып, был самолетҡа үҙҙәре артынан ергә төшөү тураһында талап иткәнлектәрен билдәләр менән күп тапҡырҙар белдергәндәр. Ошо бойороҡ үтәлмәгәндән һуң, бындай ваҡиғалар өсөн билдәләнгәненсә, иҫкәртеү атыуҙары яһалған.

Совет Посольствоһы нотаһында, юғарыла күрһәтелгән самолеттың осоуы тураһында Совет командованиеһына белдерелмәне һәм шуға күрә хәрби-диңгеҙ базаһы сиктәре эсендә самолет күренгәс, бындай ваҡиғалар өсөн ғәҙәттәге саралар күрелде, тип күрһәтелә. Хәрби диңгеҙ базаһы районында күренгән самолетҡа үҙҙәре артынан ергә төшергә талап итеүсе Советтар Союзының ике һаҡсы самолетының хәрби-диңгеҙ базаһы Порт-Артур өсөн билдәләнгән тәртипкә ярашлы рәүештә эш иткәнлектәре үҙенән-үҙе аңлашылып тора. Был тәртип хәрби һәм хәрби-диңгеҙ базалары өсөн ғәҙәттә ҡулланыла торған режимға ярашлы булып тора. Советтар Союзының бындай тәртип урынлаштырырға булған хоҡуҡы Порт-Артур тураһында Советтар Союзы менән Ҡытай араһындағы 1945 йыл 14 апрель килешеүенә нигеҙләнә. Был килешеүгә ярашлы рәүештә, Порт-Артур хәрби-диңгеҙ базаһын обороналау СССР хөкүмәтенә ышанып тапшырылды.

Юғарыла яҙылғандарҙан сығып, СССР-ҙың Ҡытайҙағы посольствоһы сит ил эштәре министерствоһы нотаһында яһалған протест нигеҙлекһеҙ, тип иҫәпләй.

Ошондай, теләккә ярашлы булмаған ваҡиғаларҙың яңынан ҡабатланыуын булдырмаҫ өсөн Совет Посольствоһы Министерствоһынан Ҡытайҙың тейешле властарына Ҡытайҙың гражданский самолеттарының хәрби-диңгеҙ базаһы Порт-Артур территорияһы йәки акваторияһы өҫтөнән осоуҙары тураһында Советтар Союзының Порт-Артурҙағы командованиеһына киләсәктә алдан белдереп ҡуйыу тураһында тейешле күрһәтмәләр биреүҙе һорай.

(ТАСС).

СССР менән Болгария араһындағы сауҙа мөнәсәбәттәренә ҡарата

СССР Тышҡы Сауҙа министерствоһы менән Болгария Сауҙа Делегацияһы араһында алып барыла торған һөйләшеүҙәр 1948 йылға сауҙа һәм диңгеҙҙә йөҙөү тураһындағы договорға үҙ-ара тауар поставкалары тураһындағы килешеүгә ошо йылдың 1 апрелендә ҡул ҡуйыу менән тамамландылар.

Сауҙа һәм диңгеҙҙә йөҙөү тураһындағы договор сауҙа һәм диңгеҙҙә йөҙөү мәсьәләләрендә үҙ-ара иң яҡшы мөнәсәбәттә булыуҙы күҙҙә тота.

Үҙ-ара тауар поставкалары тураһындағы килешеү 1948 йылда үҙ-ара тауар әйләнешен тормошҡа ашырыуҙың тәртибен һәм күләмен билдәләй.

Сауҙа һәм диңгеҙҙә йөҙөү тураһында договор һәм үҙ-ара тауар поставкалары тураһында килешеүгә Советтар Союзы яғынан — Тышҡы сауҙа Министре А. И. Микоян һәм Болгария яғынан — Сауҙа һәм аҙыҡ-түлек Министры К. Добрев әфәнде ҡул ҡуйҙылар.

2 апрелдә Болгария сауҙа делегацияһы Мәскәүҙән китте.

(ТАСС).

Төҙәләш темпын кырка көсәйтергә

Партия һәм хөкүмәт Октябрьск нефть промыселдәрен киңәйтеү һәм нефтселәрҙең көн-күрсш һәм культура шарттарын яҡшыртыу, торлакка булған ихтыяждарын кәнәгәтләндереү тураһында ҙур хәстәрлек күрә. Промышленность объекттарын һәм торлактар төҙөү эшенә ебәрелгән йөҙҙәрсә миллион һум средстволар шул турала һөйләйҙәр.

Тиҙ, арзан һәм юғары сифатлы итеп төҙөү, государство тарафынан ебәрелгән средствоны һаҡлык менән тотоноу төҙәләш ойошмаларының төп бурысы булырға тейеш ине. Үкенескә ҡаршы ул юҡ. «Главнефтегазстройҙың» Туймазы территориаль-төҙәләш управлениеһе берләштергән төҙәләш управлениелары йылдан-йыл төҙәләш пландарын үтәүҙе өҙәп киләләр һәм государствоның миллиондарса һум средстволарын артык расходлайҙар. Һөҙөмтәлә Октябрьск нефтселәре торлаҡтар етешмәү кыйынлыгы кисерәләр, промышленность объекттарын төҙөү һуҙыла.

Туймазы территориаль төҙәләш управлениеһе үткән йыл капиталь төҙәләш планын 35 процент самаһына ғына үтәне. Ә шул уҡ ваҡытта 18 миллион һум зарарға юл куйҙы. Инде яңы йылдың да өс айы үтте. Ләкин үҙгәреш аҙ. Төҙәләш темпы түбән. Төҙәләш управлениелары һәм конторалары зарар менән эшләүҙәрен дауам итәләр.

Сәбәп нәмәлә? Ни өсөн план үтәлмәй, ни өсөн миллионларса һум зарарға юл куйыла? Төҙөүселәр государство тарафынан ебәрелгән ҙур средствоны эффектле файҙалана белмәйҙәр, һәр урында хужаһыҙлыҡ, яуапһыҙлыҡ хөкөм һөрә.

Средстволарҙы беренсе нәүбәттәге объекттарға юнәлтеү һәм уларҙы төҙөү эшен эҙмә-эҙлекле рәүештә тамамлауға өлгәшеү урынына, төҙәләш управлениелары бер үк ваҡытта күп һандағы объекттарҙа төҙөү эштәре башлайҙар һәм ярты өлөшөн дә тамамламаған килеш эште туҡтатып куялар.

Бына, мәҫәлән бер төҙәләш управлениеһе үткән йылдың башында бер үк ваҡытта 33 коттедже, дүрт урында һәр береһе 16-шар квартиранан торған икешәр ҡатлы йорт, урта мәктәп бинаһы, һәр береһе һигеҙәр квартиранан торған ике каркас йорт төҙөй башланы. Быларға йөҙҙәрсә мең һум аҡса һалынды. Ә июль айы килеп еткәс, управление башланған төҙәлештәрҙе туҡтатып, бөтә көстө бер мәктәп бинаһын төҙөүгә ташланы.

Икенсе бер төҙәләш управлениеһе кирбес заводын төҙөүгә 800 мең һум аҡса тотонғас, уны төҙөп бөтмәйенсә туҡтатып куйҙы. Сөнки завод тамам эшләнеп етмәгән проект менән һәм техник документацияһыҙ төҙәлә башланған. Ә төҙәләшкә кәрәкле кирбес Стәрлетамаҡтан, Өфөнән ташыла. Быныҡ шулай булыуын тик Туймазы территориаль-төҙәләш управлениеһе етәкселәренең государство алдында яуаплылыҡ тойғоһо һиҙмәүҙәре менән генә аңлатырға мөмкин.

Шул уҡ төҙәләш управлениеһе турбиналы бораулау контораһы бинаһын ике йыл төҙөй. Ләкин ул һаман да тамамланмаған. Ә уны төҙөү бер ярым тапкыр кыйбатка төшкән. Үткән йылда башланған нефтеналы станцияһын төҙөү эше лә туҡталыу алдында тора. Сөнки территориаль-төҙәләш управлениеһенең техник бүлеге техник документтар менән тәъмин итмәгән.

Фактылар шулай. Улар ғына ла түгел әле.

Хужаларса, рациональ файҙаланмау, һаҡлау һәм учет эштәренең булмауы арҡаһында ҡиммәтле төҙәләш материалдары туҙҙырыла, әрәм-шәрәм ителә. Техник бүлектең Ик йылғаһынан алып тимер юлға тиклем ике-өс километрға һуҙылған складтарында бик күп деталләр, төҙәләш материалдары, йыйылған йорттар ҡар аҫтында, боҙҙа, шлакҡа күмелеп яталар. Улар боҙола, юғалалар.

Октябрьскиҙә кирбес иң дефицитле төҙөү материалы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, уны һаҡлыҡ менән тотонмайҙар. Платформаларҙан уны ҡайҙа тура килде шунда бушаталар, нисек тура килде шулай ырғыталар. Һөҙөмтәлә кирбестең 60 проценте ватылып, ярарһыҙ хәлгә килә. Бындай хәлде бөтәһе лә күрәләр, беләләр, ләкин бер төрлө лә сара күрмәйҙәр. Тик бер генә төҙәләш управлениеһе буйынса үткән йыл төҙәләш материалдарын юғалтыуҙан 500 мең һум зарар күрелде.

Төҙәләш ойошмалары һәм конторалары рентабелле эшләү тураһында күп һөйләйҙәр. Ләкин хәҙергә улар һөйләү булып ҡына ҡалалар. Төҙәләш материалдарын туҙҙырыу, әрәм-шәрәм итеү, башланған төҙәләштө тамамламайынса ташлау, яңыларын башлау, средстволарҙы төрлө урынға ваҡлап бүлгеләү дауам итә. Хеҙмәтте күп талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу тағы ла насарыраҡ тора. Бөтә управление буйынса үткән йыл ер эштәрен механизациялау планы бары тик 5 процентка генә үтәлде.

Ә ер эштәрен механизациялаштырыуҙа ҡалала өлгөлө миҫалдар аҙ түгел бит.

Мәҫәлән, «Нефтезаводмонтаж» тресы управлениеларенең береһе нефтепровод ҡоролмаһын төҙөгәндә ер эштәрен тулыһынса тип әйтерлек механизациялаштырҙы. Был сара управлениегә планда билдәләнгән 245 мең һум һәм пландан тыш 968 мең һум накопление биреүҙе тәъмин итте. Ләкин был өлгө Октябрьск ҡалаһындағы башҡа төҙәләш ойошмаларына күсерелмәне.

Башкортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы республикала төҙәләш эштәренең барышын бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек тип билдәләне һәм төҙәләш работниктарынан, уларҙағы тәүге партия ойошмаларынан һәм ВКП(б) горкомдарынан төҙәләш эштәренең темпын кырка көсәйтеүҙе талап итте. Конференцияның был талабы беренсе нәүбәттә Октябрьск ҡалаһының төҙөүселәренә һәм партия ойошмаларына ҡайтып ҡала. Төҙәләштә хурлыҡлы рәүештә артта ҡалыусылыҡты бөтөрөү, государство средстволарын, төҙөү материалдарын артык расходлауға, туҙҙырыуға, әрәм-шәрәм итеүгә ҡаршы рәхимһеҙ көрәш асыу нигеҙендә, бөтә эске мөмкинлектәрҙе һәм механизмдарҙы боевой хәрәкәткә килтереү һәм социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә төҙәләштә удар темптар менән алып барырға кәрәк.

И. Болдогоев.

Башкортостан ебәкселек ғилми-тикшеренеү станцияһы РСФСР-ҙың ебәкселек хужалыҡтары өсөн микроскопсы-контролер кадрҙар әҙерләй. Уҡ быйыл март аҙағына 28 кеше әҙерләп сығарыу.

Һүрәттә: (һулдан уңға): А. Г. Михеева, У. Г. Молчанова, А. З. Авдонина иптәштәр станция лабораторияһында эш өҫтөндә.

В. Жданов фотоһы.

УЖЫМ СӘСЕҮЛЕКТӘРЕНӘ— ХӘСТӘРЛЕКЛЕ ТӘРБИӘ!

Ашламалар тупламайҙар

ШАРАН. Районда ужым сәсеүлеге бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының яртыһын тәшкил итә. «Ленин юлы», «Түкәрәс», Фрунзе һәм Пугачев исемендәге ауыл хужалыҡ артелдәре кеүек районның алдынғы колхоздары ужымдарҙы тәрбиәләү буйынса ҙур хәстәрлек күрәләр. Районда бөтәһе 12 мең центнер көл һәм 900 центнер ҡош тиҙәге йыйылды, урындағы ашламалар әҙерләү планы тулыһынса үтәлде.

Ләкин артта ҡалған колхозларҙа эш насар тора. «1 май», «Серп и молот», Тукай, Куйбышев һәм Молотов исемендәге колхоздар кеүек күп кенә хужалыҡтар көл һәм ҡош тиҙәге әҙерләү планын яртыһына ла үтәмәгәндәр. Шулай уҡ был колхоздарҙың етәкселәре нисә гектар ужымды ашламалар менән туҡландырыу кәрәклеген дә белмәйҙәр, хатта был сараларҙы яҙғы эштәр планына ла индермәгәндәр.

Колхоздарҙы минерал ашламалар менән тәъмин итеү эше лә бик насар бара. Килтерелергә тейешле булған 500 центнер сульфат аммоний урынына, ни бары 50 центнер генә килтерелгән.

И. Абдуллин.

Алдынғылар кеүек эшләргә

БОРАЙ. (Телефон аша). Райондың колхоздары быйыл яҙ 17 мең гектар ужым сәсеүлектәрен тырматырға, 1 мең 400 гектар майҙанда өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрергә тейештәр.

Был эшкә «Кыҙыл Октябрь» ауыл хужалыҡ артеле членлары ҙур инициатива күрһәттеләр. Улар быйыл беренсе тапкыр 20 гектар ужым сәсеүлегенә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрәсәктәр. Шуның 10 гектары тиреҫ шыйыкса һы, 10 гектары ҡош тиҙәге менән аҙыҡландырыласаҡ. Хәҙерҙән үк 250 биҙрә һыйышлы мискаларға етерлек тиклем тиреҫ һәм ҡош тиҙәге шыйыксаһы тупланып, әҙерләп ҡуйылды һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәреү өсөн талап ителгән бөтә инвентарҙар булдырылды.

«Заря» колхозы членлары ла тәжрибәле агротехник Ибраһим Суфияновтың етәкселегендә сәсеүлектәрҙе яҙ тәрбиәләүгә бик ентекле әҙерлек алып баралар. Улар быйыл ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу үткәреп, һәр бер гектарҙан 28-әр центнер урожай алыу бурысын ҡуйҙылар. Хәҙер бөтә көс минерал һәм урындағы ашламалар әҙерләүгә тупланды. «Сулаан», «Шишмә башы» колхоздары ла был өлкәлә сериҙз эш башланылар.

Үкенескә ҡаршы, бөтә колхоздарҙа ла юғары урожай өсөн көрәш былай ойошторолмаған әле. «Кама» ауыл хужалыҡ артеле быйыл 25 гектар ужым сәсеүлегенә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрергә тейеш. Ләкин быға бер нисә лә әҙерлек эше алып барылмай. Ашламалар һәм инвентарҙар әҙерләнмәгән.

Улай МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа ла эш әле көнгә тиклем сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә бер нәмә лә әҙерлек башланмаған. МТС-тың өлкән агрономы иптәш Сафиуллин был өлкәлә колхоздарға күрһәтмә бирмәй, эште ойоштороп ебәреүҙә, практик ярҙам күрһәтмәй.

Ғ. Ишметов.

Баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаларының эшен дөрөҫ ойоштороға

Хәҙер инде машина-трактор станциялары социалистик ауыл хужалығы производствоһын ойоштороуҙа бай тәжрибә тупланылар. Алдынғы МТС-тар тракторҙарҙы, комбайндарҙы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын юғары етештереүсәнлекле файҙаланыуҙың яҡшы өлгөләрен күрһәтәләр.

МТС-тарҙың машина-трактор паркын яңы техника менән байытыуға государствобыҙ һәр ваҡыт хәстәрлек күрә. Беҙҙең республикабыҙ МТС-тары быйыл да бик күп яңы машиналар аласаҡтар. Былар бөтәһе лә ерҙе эшкәртеүҙе артабан яҡшыртыу һәм колхоздарҙа юғары урожай алыу өсөн иң яҡшы шарттар тыуҙыралар.

Үкенескә ҡаршы, күп кенә МТС-тарҙа бай техниканы тулы көсөндә файҙаланыу юлға һалынмаған әле. Ҙур етешһеҙлектәрҙең береһе — ул трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларының эшен бергә дөрөҫ бәйләп алып бара белмәү. Был мәсьәлә менән бик сериҙз шөғөлләнергә кәрәк.

Союздағы алдынғы МТС-тар һуңғы йылларҙа бер трактор бригадаһын тик бер баҫыусылыҡ бригадаһын хеҙмәтләндереү өсөн генә беркетәләр. Был практика яҡшы һөҙөмтәләр бирә, юғары урожай өсөн көрәштә ике бригаданың да [illegible].

Миҫал өсөн Дәүләкән МТС-ының иптәш Желобецкий бригадаһын алайыҡ. Ул бер бригаданан ғына торған Каганович исемендәге колхозды хеҙмәтләндерә. Был трактор бригадаһы шартлы һәр бер тракторға 1946 йылда 594-әр гектар ер эшкәртеп булһа, 1947 йылда — 1120 гектар ер эшкәртте. [illegible] 1947 йылда 15 ат көсөнә һәр бер тракторға 1514,5 центнер [illegible]. Агротехник сроктар боҙолманы. [illegible]

Баҫыусылыҡ бригадаһының эше трактор бригадаһы менән бик тығыҙ бәйләнеп алып барыла. [illegible] Шуның һөҙөмтәһендә был колхоз юғары урожай ала. 1947 йылда 189 гектар арыштың һәр бер гектарынан уртаса 17,5-әр центнер урожай алды. Яҙғы бойҙай һәм һолондан да гектарҙан уртаса урожай 12—13 центнер тәшкил итте.

Трактор бригадаһын тик бер баҫыусылыҡ бригадаһына ғына беркетеү алдынғы агротехника [illegible]. Ләкин быға бөтә мөмкинлектәр һәр ваҡытта ла булмай. Дәүләкән МТС-ының Алехин бригадаһы 4 баҫыусылыҡ бригадаһынан торған «Новая жизнь» колхозын хеҙмәтләндерә. Был колхоздың 10 баҫыулы сәсеү әйләнеше ере йыйнаҡ, бер участкала. Был шарт трактор бригадаһына бер үк ваҡытта бөтә баҫыусылыҡ бригадалары участкаларында эшләү өсөн мөмкинлек бирә. Ә Рогачев бригадаһы хеҙмәтләндергән 2 баҫыусылыҡ бригадалы «Коммунар» колхозының сәсеү әйләнеше һәр бригадала айырым. Былай хәл бер үк ваҡытта ике бригаданы ла хеҙмәтләндереү эшен [illegible]. Колхоз һәм МТС бригадаларының эшен ойоштороу ваҡытында, был үҙенсәлектәргә тулы иғтибар бирергә кәрәк.

Алдынғы бригадалар былдай саҡтарҙа нисек эшләйҙәр? [illegible]

Шулай итеп, алдынғыларының эш тәжрибәһе трактор бригадаларының [illegible]

Колхоз менән төҙөлгән договорҙы теүәл үтәү өсөн трактор бригадаһына [illegible]

Трактор бригадалары хеҙмәтләндереү мәсьәләһе лә бик ҡыйыл. [illegible]

Бер нисә баҫыусылыҡ бригадаһына һәм колхозға бер трактор бригадаһы беркетелгән саҡта, [illegible]

Оракламай яҙғы баҫыу эштәре башланасак. Колхоз һәм трактор бригадаларының эштәрен дөрөҫ ойоштороу [illegible] МТС һәм колхоз етәкселәре был мәсьәлә менән сериҙз шөғөлләнергә тейештәр.

Агроном М. Ғәлиев.

Колхоз ауылынан хаттар

2. Сәсеү алдынан

Кинлек, аппаҡ кинлек... Ҡыш буйына ҡалын ҡар юрғаны аҫтында ятҡан ҡырҙар ҡояшҡа иркәләнеп ҡалҡынырға, яҙ ташҡынында уйнатып талпынырға ынтылаларҙыр кеүек.

Апрель үҙ хоҡуҡтарына инә. Ҡар һыуҙары ағылыр, тауҙағы бураҙналар һыҙылыр көндәрҙе бөтә йөрәктән ашҡынып көткән игенселәр баҫыуға сығыр өсөн һуңғы әҙерлек сараларын үткәрәләр.

Тиреҫ тейәлгән һуңғы йөктәр баҫыу яғына оҙатыла.

Эш инвентарҙарына һуңғы тикшереү үткәрелә.

Инде март айында уҡ махсус рәүештә ашатылырға ҡуйылған көр аттарҙың кешнәүҙәре һәр иртә һайын бөтә ауылға яңғырап тарала...

...Ян-яҡ тәҙрәләрҙән бөркөлгән йылы ҡояш нурҙарына иркәләнеп, ыҫ ҡыйығынан тамған теҙмә тамсыларҙы күҙләп, күңелләнеп ултырыусы ҡыҙҙар һәм егеттәр — звеноводтар һәм звено членлары Рәүеф Абдрахмановтың «Яҙғы бойҙайҙың агротехникаһы» циклынан ҡабатлап уҙғарған беседаларҙың иң һуңғыларынан береһен тыңлайҙар. Агротехника түңәрәгенең занятиеларе ҡыш буйына аҙнаһына ике тапҡыр уҙғарылып барҙы.

Баҫыуҙа эшләйәсәк колхозсыларҙың бөтәһе лә, хатта аҡ һаҡаллы ҡарттар ҙа Рәүеф Абдрахманов тарафынан уҙғарылған занятиеларҙың береһен дә ҡалдырмайынса йөрөргә күнегеп еттеләр. Ужым арышын яҙ көнө тырматыу һәм яңалма һеркәләндереү, бойҙайҙы арҡылыға-буйға сәскәндән һуң, махсус каток менән ерҙе тығыҙландырыу, һуңынан, ҡыуаҡланыу осоронда өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәреү, — уҙған йылда Абдрахманов звеноһы тарафынан ғына ҡулланылған был методтар хәҙер бер кем өсөн дә сер түгел инде. Ҡышҡы осорҙа төҙәлгән биш звено быйыл яҙғы эштәрҙе мул урожай звеноһының тәжрибәлә һыналған методтары буйынса уҙғарырға әҙерләнә. Ә был эштәрҙең күләме бәләкәйҙән түгел: һәр звено 20-шәр гектар арыштан һәм 10—20-шәр гектар бойҙайҙан 150—200-шәр бот урожай үҫтерергә йөкләмә алды.

Агротехника түңәрәгендә алған теоретик белем нигеҙендә уҙғарыла был әҙерлек эштәре. Ерҙәрҙе ашлау өсөн һәр гектарға 30—40 центнер иҫәбенән баҫыуға тиреҫ сығарылды һәм өҫтәмә аҙыҡландырыуға кәрәкле тиреҫ шыйыксаһы әҙерләү өсөн база булдырылды. Көл һәм ҡош тиҙәге йыйыу әле лә дауам итә. Шуның өҫтәүенә аммиак селитраһы ашламаһын ҡулланыуҙы ла арттырыуға ныҡлы ышаныс бар.

Йылы туналарын ҡыҫҡа бишмәттәргә алыштырған егеттәр, шәлдәрен ҡыйғаслап бәйләгән ҡатындар, ҡыҙҙар көндәр оҙонайған һайын урамдарҙа йышыраҡ күренәләр. Уларҙың етди, эшлекле йөҙҙәренән бер генә һүҙҙе уҡыйһың: яҙ яҡынлаша, яҙ! Билдәрҙе нығыраҡ быуырға, ҡыш буйы алып барылған әҙерлек эштәрен теүәлләргә кәрәк.

Бер төркөм ҡыҙҙар сәсеү орлоҡтары һалынған келәттәр алдындағы көрт өйөмөн ҡаҙыйҙар, ҡарҙы ситкә, соҡорға сығарып түгәләр. Колхоздың бөтә сәсеү майҙанына етерлек сортлы орлоҡтар көҙҙән үк таҙартылып ҡуйылған инде. Хәҙер келәттәргә эреген ҡар һыуы инмәүен, транспорт бригадаһы килгәндә ихатаның таҙа һәм киҫкән булыуын ҡайғырталар был ҡыҙҙар. Бына бер-ике аҙнанан улар бойҙай орлоҡтарын яровойлаштырырға тотонорҙар. Әле башҡалар бер тапҡыр бил бөгөп ҡалҡынғансы үҙенсе киң ағас көрәген ике-өс тапҡыр бушатырға ынтылып эшләүсе шаян комсомолка Рәҡиә Муллағәлина, тап уҙған йылдағы кеүек үк, орлоҡтарҙы яровойлаштырыуҙа иң оҫта лаборантка ла, дуҫтарының кәңәшсеһе лә булыр.

Ҡаҙылған ҡарҙы санаһының һыртына еткерерлек итеп тейәп ат ҡыуалаусы 17 йәшлек ҡыҙҙың Закира Байтурина икәнлеген дә, уҙған йылда мул урожай звеноһында уның бик тырышып эшләгәнлеген дә бөтәһе лә беләләр. Ул көҙ көнө орлоҡ таҙартыу, тамамланыу менән ат ҡарарға инергә теләк белдергәс, ҡай берәүҙәр ғәжәпләнгәйнеләр.

— Уға ни ҡалмаған тағы ирҙәр эшенә тығылып йөрөргә!

Закира һәм уның баҫыуҙа тағы ла ҙурыраҡ батырлыҡтар күрһәтергә — гектарынан 200-әр бот урожай алырға ынтылыусы дуҫтары икенсе төрлөрәк фекер йөрөттөләр. Комсомолка Закираның ҡышҡы осорҙа ат ҡарауҙа эшләүенә бик шатландылар. Сөнки, ер эштәренең күп өлөшө трактор көсө менән башҡарылһа ла, аттарға ла ҙур ғына өлөш төшәсәк. Быйыл колхоздың сәсеү майҙаны 90 гектарға арттырыласаҡ бит. Ерҙе тырматыу, сәсеү эштәрен аттар көсө менән башҡарыу планлаштырылған икән, был малдарҙың юғары көрлөктә булыуҙары өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Мөмкин булғанда, һәр эшкә үҙенә оҡшағанса, үҙ намыҫың ҡушҡанса башҡарыу яҡшыраҡ икәнлеген уларға аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ инде.

Ат һарайҙары артындағы тимерлек бинаһында сүкеш тауыштары ишетелеүгә генә ҡарап, колхозда яҙғы эштәргә кәрәкле инвентарҙар ремонтланып бөтмәгән икән, тип уйларға ярамай. Ниғмәтбай Ибраһимов — уҙған яҙҙа үҙ эшенең ретенә төшөнөп етә алмаған йәш звеновод — тимерсе Ғәли ағай Ниғмәтуллин эргәһенә барған. Звеноның бөтә кәрәкле нәмәләре лә әҙер. Тик бына трактор культиваторы өсөн оҙон һапты, үткер һәм уңайлы ҡарлауҙар ғына кәрәк Ниғмәтбайға. Уҙған йылда Абдрахманов звеноһының ерен культивациялағанда уның ҡыҙҙары ҡулында әле ул үҙе яһатҡан тәҫле ҡарлауҙарҙы күреп, йылмайып ҡына ҡуйғайны, «машина ерҙе былай ҙа аҡтарып сығара» тип киткәйне. Аҡтарға белһәң генә ерҙе яҡшылап аҡтара икән ул, машина. Ул саҡта Ниғмәтбай участкаһында бойҙайҙы ҡыҫҡланып етер-етмәҫтән элек үк ҡыйғыл баҫты, Рәүеф бойҙайлығында һарут бөртөктәре лә күренмәне.

Төрлө участкаларҙың төрлөсә эшкәртелеүендә трактористарҙың да ғәйебе булған инде. Шуның өсөн дә әле бына тракторҙар ремонттан ҡайтыу менән йәштәр комсорг Ибраһимовҡа йәгерәп барҙылар. «Трактористар менән берлектә асыҡ йыйылыш үткәрәйек!» Йыйылыш ысынлап та бик йәнле, ҡыҙыҡлы булып үтте. Комсомолецтар уҙған йылғы етешһеҙлектәрҙе асып һалдылар һәм трактор бригадаһының бригадиры Николай Байковты бик ҡаты киҫәтеп ҡуйҙылар: бураҙна 22—23 сантиметрҙан да һай булмаһын, культиватор ерҙе өҫтән-өҫтән генә һыҙырттырып йөрөмәһен. Эш яҡшы сифатлы итеп, үҙ ваҡытында башҡарылһын! Сифат инспекторҙары Турахан бабай Байтурин һәм Сәрбәр бабай Мөхәмәтъяровтарҙың тәжрибәләре ҙур булһа, комсомолецтарҙың күҙҙәре үткер булыр!

Урожай өсөн көрәштең уңышын хәл итеүҙә мөһим рөл уйнаған тағы ла бер нәмә бар был колхозда. Ул — план. Артель членлары: «Беҙҙең эш планыбыҙ бар» тип әйтәләр икән, был һүҙҙәр диңгеҙ сәйәхәтендәге моряктарҙың, «Беҙҙең ҡарабыбыҙҙың компасы бар», тип әйтеүҙәре кеүек үк, көслө яңғырай. Февраль айында уҡ бригадаларҙа һәм звеноларҙа яҙғы-йәйге эштәрҙең планын төҙөүгә арналған махсус йыйылыштар уҙғарылды. Һуңынан был мәсьәлә правление ултырышында һәм колхоздың дөйөм йыйылышында тикшерелде. Үҙенең тәжрибәһенән сығып Рәүеф Абдрахманов яҙғы сәсеү эштәрен бөтә звеноларҙа ла 6—7 көндә тамамларға тәҡдим индергәс, колхозсылар был фекерҙе бик хупланылар. Шунан сығып эшсе һәм тартыу көстәренә нормалар билдәләнде. Индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщина ҡулланыу — бөтә эштәрҙә лә иң яҡшы метод итеп табылды.

Баҫыуҙарҙа һәр эштең моторҙар тауышы менән башланыуына бөтә кеше лә күнегеп етте инде. Быйыл колхоз тарихында беренсе тапҡыр ер эшкәртеүҙә электр көсө ҡулланыуға — 48 гектар майҙанда яңалма һуғарыу уҙғарырға әҙерлек алып барыла. Алдағы йылдарҙа барлыҡ майҙандарҙы эшкәртеүҙә лә электр энергияһы эшкә егелер. Дим буйындағы колхоздың баҫыуҙарынан алынған урожай меңәр центнерҙар менән иҫәпләнер ул ваҡытта.

Ғ. Әхмәтшин.
(Махсус хәбәрсебеҙ).

Дәүләкән районы,
«Ҡыҙыл Урал» колхозы.

КИНО

„Совет Башкортостаны"*)

Күптән түгел кинохроникаһың Куйбышев студияһы «Совет Башкортостаны» тигән тулы метражлы документаль фильм эшләп, илебеҙҙең экрандарына сығарҙы.

Был фильмдең төшерелеүе һәм эшләнеп сығарылыуы республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре өсөн ҙур тарихи ваҡиға булып тора. Сөнки ул Башкортостандың үткәнен һәм бөгөнгө тормошон социалистик ыңғайлаштырыуҙың яҡтыртып, һәм республикабыҙҙың үҫеү перспективаларын күрһәтә.

Залда ут һүнеү менән экранға: «Совет Башкортостанының кешеләре хаҡында, әлек кысма тормош менән көн иткән халҡтың хәҙер тыуғандан совет халҡтары семьяһында үҙ Тыуған илендә ҙур кешеләренә әйләнгән балалары хаҡында һөйләй был фильмдең маҡсаты асыҡлай.

Шунан һуң Россия Федерацияһының Оренбург далаларынан алып Урал тауҙарына тиклем йәйелеп ятҡан Башкорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының бай тәбиғәте — тауҙары, урмандары, йылғалары, күлдәре, болондары, туғайҙары, басыуҙары һәм башҡалар бер-бер артлы күҙ алдынан үтәләр.

— Бөгөнгө тормоштоң матурлығын ныҡлап тойор өсөн элекке тормоштоң ҡайғылы хәтерләү кәрәк,—ти башкорт халҡ мәҡәле.

Батша самодержавиеһе иҙеүенән башкорт халҡын бары тик Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы ҡотҡарҙы. Һәм 1919 йылдың 23 мартында Ленин һәм Сталиндың Башкорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһын төҙөү тураһындағы декретҡа ҡул ҡуйылар.

Был ғүзәл документаль фильм Совет Башкортостанының шул көндән алып бөгөнгө көнгә тиклем үткән юлын, уның хужалыҡ һәм культура ағынан серьеҙ темптар менән үҫеүен яҡшы асыҡ һәм ышандырырлыҡ фактлар, эшсенән һәм кадрҙар менән күрһәтеп бирә.

* * *

Өфө — Башкорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының башҡалаһы. Бынан 30 йыл элек ул тәрмәләр, кабаҡтар, меҫкен аласыктары ҡалаһы ине. Унда башкортҡар «сит кеше» иҫәпләнә ине. Хәҙер Өфө театрҙар һәм вузлар, мәктәптәр һәм дворецтар ҡалаһына, культура һәм фән ҡалаһына әйләнде.

Быуаттар буйына ҡараңғылыҡта йәшәгән һәм элек бер ваҡытта ла үҙенең әҙәбиәте булмаған башкорт халҡы хәҙер үҙ телендә газеталар, китаптар уҡый. Мәктәптәр сәләре киңәйгәндән-киңәйә бара.

Балаларға музыка өйрәтеү мәктәптәренән Мәскәү консерваторияһына уҡыусыларҙы килде.

Тирмә эстендә һыҙғырып ел ҡауышы быуаттар буйына башкорт халҡы ишетеп килгән берҙән бер симфония булһа, хәҙер Башкортостанда Чайковский, Глинка, Шопен, Бетховен, Мендельсон музыкалары яңғырай.

* * *

Башкортостанда 14 театр бар, уларҙын 9-ы милли театрҙар.

Элек бер генә юғары уҡыу йорто ла булмаған Башкортостанда хәҙер медицина, нефть, авиация, ауыл хужалығы, педагогия институттары, 48 техникум иҫәпләнә, уларҙа ун меңләгән студент уҡый.

*) Сценарий планы С. Гарин, Д. Дальский эшләнешендә. Режиссер, БАССР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле Д. Дальский постановкаһы. Режиссерҙар: А. Садецкий, В. Каштелян; кинооператорҙар: БАССР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле Г. Әмиров, А. Смолка, А. Сухов; композитор; ТАССР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле А. Ключарев.

* * *

Россиялағы иң борынғо заводтарҙан Белорет заводы — Емельян Пугачев ғәскәре өсөн пушкалар, йәдрәләр ҡойған завод ул. Ул әр яңынан реконструкцияланды һәм легирлы изделие хорос эшләүсе хәҙерге заман заводтарына әйләнде. Ленинград хеҙмәтсәндәренең «Биш йыллыҡты — дүрт йылда!» тигән саҡырыуына бөтә илебеҙгә ҡарата, был саҡырыуға ауап итеп, меңләгән стахановсылар эште мөгжизәләр күрһәтәләр.

Башкортостан бынан ун һигеҙ йылы элек һәм бары менән генә дан тотмай ине. Республиканың промышленность продукцияһы 1913 йылдынан 37 тапҡыр артты.

Башкортостан — ул комбайн моторҙары, станоктар, тукымалар иле генә түгел. Ләкин ул тимер руда, марганец, боксит һәм таш күмер ҙә бирә торған ил. Көнбағарала Көньяк Уралдың ҙур күмер базаһы төҙөлә. Башкортостанда Зигазы-Комарово тимер рудаһы, бында яңы индустрия районы барлыкка килә.

Башкортостан — ул алтын, баҡыр иле.

Сибай баҡыр рудалары ятҡылығында яңы биш йыллыҡта көсәүтле баҡыр иретеү комбинаты һалынасаҡ.

Стәрлетамаҡта Европалағы иң әре сода комбинаты сафҡа баҫасаҡ.

* * *

Бынан ун йыл элек Туймазыла яңы нефть ятҡылығы табылды. Ләкин күп тә үтмәй, Туймазы скважиналарының нефть бирәүе кәмей башланы. Туймазыла нефть бөтә, тинеләр. Ләкин рус ғалиме Губкиндең шәкерте, геолог Михаил Васильевич Мальцев: Туймазы—илдә нефтҡә иң бай урындарҙың береһе, ул байлыҡты тәбиғәт девон ҡатламына йәшергән,—тине. Девондың мең йылдарҙан бирле килгән серен асыу, унан нефть алыу Башкортостан нефтселәренең намыҫ эшенә әйләнде.

Девон өсөн Мальцев менән бергә Социалистик Хеҙмәт Геройы геолог Трофимук һәм Башнефть етәксеһе Кувыкин иптәштәр көрәштеләр.

Туймазыла девон нефте асылды. Нефть сығарыу 30 тапҡырға артты. Сталин идеяһы һәм ижады — икенсе Баку йәшәй.

Яңы заводтар, рудниктәр, шахталар, нефть промыселдәре менән бер рәттән яңы ҡалалар — Ишембай, Октябрьск, Черниковск ҡалалары барлыҡҡа килде.

* * *

Партия Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы тарихи ҡарары менән ҡоралланған колхозсылар үткән йыл юғары урожай йыйнап алыуға ирештеләр.

Мәңге файҙаланыу өсөн Башкортостан колхоздарына ете миллион ярым гектар ер бирелде. Башкортостан ҡырҙарында ағас тырма, һуҡа түгел, ә тракторҙар, комбайндар; шыбағас түгел, ә электр молотилкалары эшләйҙәр хәҙер.

«Золотой колос» колхозында РСФСР Верховный Совете депутаты Анна Николаевна Чуеваның өйөнә ауыл почтальоны һәр көн иртәнсәк килеп китә. Алыҫ Алтай, Украина һәм Дон ауылдарынан Анна Чуеванан кәңәш һорап хаттар яҙалар. Ул атаҡлы профессор түгел, ябай келтә бәйләүсе. Анна Чуева көнөнә 10 меңдә бер йөҙ келтә бәйләп, бер үҙе 50 кеше эшләгәнде эшләне.

«Золотой колос» һәм Ленин исемендәге колхоздар бер-береһенән алыҫ торалар, ләкин социалистик ярыштың бөйөк көсө алыҫлыҡты б[illegible]мәй. Фатима Баязитова үҙ ме[illegible] менән бер көндә 11 мең 330 келтә бәйләне. Ленин исемендәге колхозда ун ете йәшлек комсомолка Фәрәһиә Шакирова етәкселегендә йәш колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар мул урожай үҫтерҙеләр; уны, бер башағын да ҡалдырмайынса, йыйып алдылар.

* * *

Бынан ун йыл элек ун биш йәшлек Муса Гәрәев Таш-Шишма ауылынан Өфөгә уҡырға китҡәйне. Ул ваҡытта әле бер ни менән дә билдәле булмаған был башкорт малайын Совет Тыуған иле юғары күтәрҙе һәм бөгөн Таш-Шишмә ауылы элекке көтөүсе Мусаны түгел, ә СССР Верховный Совете депутаты, штурмлау эскадрильяһының данлы командире, ике тапҡыр Советтар Союзы Геройы, Гвардия майоры Муса Ғайса улы Гәрәевте ҡаршы алды.

* * *

Башкортостандың юлдары күп, һәм бөтә ошо юлдар буйлап алтындай ҡиммәт иген ағымдары ағыла. Был — азат ерҙең мул урожайы. Шакированың һәм Чуеваның, Биктимеровтың һәм Баязитованың, Ғазиевтарҙың, Арслановтарҙың һәм меңләгән бүтән совет патриоттарының игене килә. Башкортостан колхозсылары үҙҙәренең изге бурыстарын үтәйҙәр. — Тәүге ашлыҡ үҙебеҙҙең тыуған государствоға!

Башкортостан юлдарында ҡыңғырау тауыштары яңғырай, йылғыр тройкалар елә, халҡ колхоз ҡырҙарындағы еңеүен байрам итә.

Бөйөк Ленин—Сталин партияһы элекке батша Россияһының артта ҡалған, иҙелгән халҡтарын яңы социалистик тормоштоң киң, яңы юлына алып сыҡты. Бөйөк Ленин — Сталин партияһы совет халҡтары семьяһын алға, коммунизмға табан алып бара.

* * *

Фильм беҙҙең бик күп тармаҡлы промышленносебеҙҙе лә, социалистик ауыл хужалығыбыҙҙы ла, формаһы менән милли, йөкмәткеһе менән социалистик культурабыҙҙы ла байтаҡ дәрәжәлә тулы итеп күрһәтә алған.

Фильмдә Башкортостан нефтселәренең девон нефте өсөн көрәшен күрһәтеү иң уңышлы һәм иң тулҡынландырғыс момент булып тора. Был кадрҙарҙы бер генә кеше лә тыныс ҡына ҡарай алмаҫ. Ул, экрандағы девон нефте өсөн көрәшеүселәр менән бергә кисерәсәк, улар менән бергә шатланасаҡ.

Бер сәғәт самаһы ваҡыт эсендә тамашасылар Башкортостанда хәҙер намәләр эшләнгәнлеген белергә, уның халҡының хеҙмәт менән биҙәлгән тормошон, тыныш хеҙмәт һуңында уның һәҙәмтәһе рәүешендә үткәрелә торған шатлыҡлы байрамдарын күрергә өлгөрәләр.

Фильм ҡайнап, урғылып торған хеҙмәт пафосына, ижад дәртенә бай. Ләкин тормош үҙе тағы ла байыраҡ һәм гүзәлерәк бит, уны һис бер ниндәй киноаппараттар менән дә плёнкаға төшөрөп алып бөтөп булмай, әлбиттә.

Ләкин, шулай ҙа фильмдә беҙҙең батыр яҡташыбыҙ Александр Матросов тураһында бер генә һүҙ ҙә әйтелмәүҙе иң ҙур кәмселек тип һанарға кәрәк.

Фильмдә эйәһеҙләндерелгән, яҙыу менән дә йәки диктор тарафынан да телгә алынмай торған, уларҙың нәмә йәки кемдәр икәнлеген әйтеп бирелмәгән кадрҙарҙың күп кенә булыуы фильмдең дәрәжәһен төшөрә.

Музыкаль оформлениелә башкорт совет композиторҙарының һуңғы ваҡытта яҙған музыкаль әҫәрҙәренән Заимовтың «Сталин тураһында кантатаһынан» башҡа бер нәмәнең дә күрһәтелмәүе фильмде музыкаль яҡтан оформить итеүсе А. Ключаревтең кәмселеге булып тора. Сөнки республикабыҙҙың хужалыҡ яғынан үҫеүе менән бергә музыкаль культураһы ла туҡтауһыҙ үҫә бара. Быны иғтибарға алмау мөмкин түгел ине.

Юғарыла күрһәтелгән ҡайһы бер кәмселектәренә ҡарамаҫтан, был фильм тамашасыла үҙ Тыуған иленә булған мөхәббәтен тағы ла нығытасаҡ һәм үҫтерәсәк, Советтар Союзындағы башҡа халҡтарҙы Совет Башкортостаны менән, уның ҡайнап торған ижади тормошо һәм уның күренекле кешеләре менән таныштырасаҡ.

Р. Хәйри.

Бөйөк сәйәхәтсе Миклуха-Маклай иҫтәлеге

Бөйөк рус сәйәхәтсеһе, географы һәм этнографы Миклуха-Маклайҙың үлеүенә 60 йыл тулыу айҡанлы Өфө ҡалаһының ғилми общественносе тарафынан лекциялар циклы ойошторола.

Ғалимдар йорто һәм уҡытыусылар йортонда Миклуха-Маклайҙың эшмәкәрлегенә арналған беренсе лекциялар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңландылар.

Өфө ҡалаһындағы бөтә урта һәм ете йыллыҡ мәктәптәрҙә бөйөк сәйәхәтсенең хеҙмәт юлын өйрәнеүгә арналған йыйылыштар үткәрелә. Башкорт педагогия институтының география факультеты тарафынан ҙур күргәҙмә ойошторола.

14 апрелдә ғалимдарҙың, география уҡытыусыларының тантаналы ултырышы үткәреләсәк. Йыйылышҡа ҡатнашыусылар бөйөк сәйәхәтсе Миклуха-Маклайҙың эшмәкәрлеге тураһында һәм «Россия географияһының прогрессив роле» тигән темаға доклад тыңлаясаҡтар.

Һунарсылар йыйылышы

Уҙған ял көнө ПВРЗ клубында башҡала һунарсыларының һәм балыҡсыларының йыйылышы булды. Улар Башкортостанда һунарсылыҡ эшен яҡшыртыу мәсьәләһен тикшерҙеләр. Көн тәртибе буйынса Башкорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге һунарсылыҡ хужалығы управлениеһе начальнигы иптәш Петин доклад яһаны.

Докладтан һуң 18 кеше сығып һөйләне. Улар һунарсылыҡ эшендәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләнеләр һәм эшлекле тәҡдимдәр индерҙеләр. Йыйылыш һунарсыларҙың өлкә союзынан атыш стенде ойоштороуҙы, мылтыҡтарҙы ремонтлау мастерскойы асыуҙы талап итеүсе ҡарар ҡабул итте. Шуның менән бергә, йыйылыш һунарсылыҡ ҡоралдары, припастары менән сауҙа итеүҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү саралары билдәләне.

Иң аҙаҡта йыйылыш Башкортостан һунарсыларының өлкә конференцияһына делегаттар һайланы.

Финанс работниктәренең республикан кәңәшмәһе

Ошо көндәрҙә Өфөлә финанс работниктәренең республикан кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә бөтә район һәм ҡала финанс бүлектәре һәм һаҡлыҡ кассалары мөдирҙәре ҡатнаштылар. Бында финанс органдарының үткән йылғы эш йомғаҡтары һәм алда торған бурыстар тураһында БАССР финанс министре иптәш Валиевтең доклады тикшерелде.

Кәңәшмә шулай уҡ конверсия уңайы менән государство заемдары облигацияларын алмаштырыуға ҡарата әҙерлектең барышы тураһында Башкортостан хеҙмәт һаҡлыҡ кассалары управлениеһе начальнигы иптәш Абрамовтың инструктив докладын тыңланы. Республикала иҫке заем облигацияларын конверсион заемға алмаштырыу эше 25 майҙа башланыуы күҙҙә тотола. Конверсия үткәреүгә ҡарата хәҙерге көндә урындарҙа финанс органдары тарафынан әҙерлек эше алып барыла.

Уҡыусылар конференцияһы

ДӘҮЛӘКӘН. Ошо көндәрҙә район культура йортонда уҡыусы пионерҙарҙың конференцияһы булып үтте. Конференциялә икенсе номерле урта мәктәп уҡытыусыһы иптәш В. Б. Андресанова яҙыусы С. Я. Маршактың тормошо һәм әҫәрҙәре тураһында доклад яһаны.

Доклад буйынса 16 уҡыусы сығыш яһап, С. Маршактың әҫәрҙәре тураһында үҙ фекерҙәрен һөйләнеләр һәм яҙыусының әҫәрҙәренән өҙөктәр уҡынылар.

Беренсе номерле мәктәптең уҡыусылары Маршактың «12 ай» тигән пьесаһын сәхнәгә ҡуйҙылар. Балалар үҙҙәренең һөйөклө яҙыусыларына хат яҙҙылар.

ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан сығарыла торған «Пропагандиска һәм агитаторға ярҙамға» йыйынтығының 3-сө номере баҫылып сыҡты.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

АҠШ-та фашистәрҙең тәртип боҙоуҙары

НЬЮ-ЙОРК, 1 апрель. (ТАСС). Америка матбуғаты тарафынан АҠШ-та коммунизмға ҡаршы башланған фашистик хәрәкәттәр һаны арта.

Матбуғаттың Колумбустан (Огайо штаты) хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, 30 мартта фашистик хулигандарҙың ҙур төркөмө Колумбус ҡалаһында компартия секретаре Хэшмелден квартираһына инген һәм унда погром үткәргән. Полиция быға юл ҡуйған. Бында бик күп һанда полицейскиҙәр ҡатнашһа ла, погромщиктарҙең береһе генә лә ҡулға алынмаған.

Огайо штаты компартияһы председателе Холл хәбәрселәргә, фашистәрҙең Хэшмел йортон емереү айҡанлы Скриппс-Говардтың «Колумбус ситизен» газетаһына һәм урындағы власттәргә ҡаршы эш ҡуҙғатыуы тураһында белдерҙе һәм был газета халҡтарҙы ошо йортҡа һөжүм итергә ҡотортто, тип күрһәтте. Был йортҡа һөжүм итеү, «Германияның нацистик элементтәре, Форте-Хейстәге хәрби ойошма һәм католик профсоюздар ассоциацияһының члендәре тарафынан эшләнде. Колумбустың мэре һәм полиция начальниге фашистәрҙең был эшен тулыһынса хупланы».

Детройтта полиция начальниге, «Америкаға ҡаршы кешеләрҙе атып үлтерергә кәрәк һәм Уоллес Америкаға ҡаршы кеше ул», тип белдерҙе. Детройт хулигандарының бер төркөмө Уоллесте яҡлау өсөн саҡырылған конференцияға өҙәргә маташҡанда, полиция уларға ҡомасауламау ғына түгел, бәлки конференция делегаттары ултырып килгән автомобилдарҙың номерҙәрен асыҡтан-асыҡ яҙа барыуы ла ғәжәп түгел.

«Дейли Уоркер» газетаһы, Вудстокта (Нью-Йорк штаты) Ку-Клукс-Кландың фашистик ойошмаһы Уоллесте яҡлаусы кешеләрҙе һәм ойошмаларҙы ҡурҡыта тип яҙа. Ку-Клукс-Клан ойошмаһы Нью-Йорк штатында официаль рәүештә тыйылған булһа ла, штат губернаторы Дьюи Вудсток граждандарының күп тапҡырҙар [illegible] ған протестәренә һәм фашистәрға ҡаршы саралар күреү тураһындағы һорауҙарға яуап бирмәне әле, ти яҙа.

27 мартта Ку-Клукс-Клан членәре фашистик демонстрацияға ҡаршы протест яһаусы бер кешеләрҙе телефон аша ҡурҡыттылар.

«Нью-Йорк таймс» хәбәрсе Мэдисондан (Висконсин штаты) Америка армияһы формаһына кейенгән йәштәр төркөмө Висконсин штаты университетенең библиотекаһы алдында 8 студент, политик һәм дини ойошмалар тарафынан ойошторолған һәм хәрби хеҙмәт итеүҙе индереүгә ҡаршы йүнәлтелгән демонстрацияны ҡыуҙы, тип хәбәр итә.

Американың Япониялағы политикаһы тураһында Австрия хәбәрсеһе

СИДНЕЙ, 1 апрель. (ТАСС). «Сидней Морнинг геральд» газетаһының хәбәрсеһе Персивал, Американың Японияға ҡарата булған пландары Азия илдәрендә тынысһыҙлыҡ тыуҙыралар, тип күрһәтә. Персивалдың һүҙҙәренә ҡарағанда, был илдәр американлыларҙың Японияны ла «Алыҫ Көнсығыш мастерскойына» әйләндерергә уйлауҙары айҡанлы тревога белдерәләр. Япония экономик хакимлек яулап ала алһын өсөн, әгәр ҙә Ҡытай, Филиппины, Малайя, Индия, Бирма, Сиам һәм Индонезия Япония заводтарын яңынан сырье менән тәьмин итергә тейеш булһалар, ул саҡта аҙаҡ иҫәптә Япония политик һәм хәрби хакимлекте яулап аласаҡ.

Персивал шунан ары, Японияһан репарациялар иҫәбенә оккупацияның башланыуынан алып бер генә эре завод та унан сығарылманы, тип күрһәтә. Дзайбацу мөлкәте (Японияның финанс промышленность монополиялары. — Ред.) әлегә тиклем тейелмәй әле. Японияның сит ил эштәре министрлығы Япония хөкүмәте менән Америка оккупацион ғәскәрҙәре командованиеһе араһында бәйләнеш бюроһы сифатында үҙенең эшен дауам итерә.

Барыһынан элек Ҡытай, Филиппины, Индия, Сиам, Бирма һәм Азияның башҡа илдәре вәкилдәрен, тип яҙа һәҙемтәләү һүҙенә Персивал, оккупацион политиканың Советтар Союзына ҡаршы йүнәлтелгән характеренән Макартур штабын, «Япония бер ҡасан да сит ерҙәрҙе баҫып алыу өсөн һуғыш башлай алмаһын өсөн уның хәрби потенциалын бөтөрөүгә ҡарата һуҡыр итеүе фактары тынысһыҙландыра. Макартур штабының оккупацион политикаһы шул тиклем ныҡ үҙгәрҙе, Япония менән ярашыу договорына ҡул ҡуйылғанға тиклем үк ул союзник итеп ҡарала».

Көньяҡ Кореяла Америка ғәскәрҙәре һанының артыуы тураһында Нанкин радиоһы

НАНКИН, 1 апрель. (ТАСС). Нанкин радиоһының авторитетле круғтарға һылтанып, Сеулдан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Көньяҡ Кореялағы Америка ғәскәрҙәренең һаны 50 процентҡа артҡан.

ДЕМОКРАТИК ГРЕЦИЯҒА ЯРҘАМ ИТЕҮ БУЙЫНСА ХАЛҠ-АРА КОНФЕРЕНЦИЯ

ПАРИЖ, 2 апрель. (ТАСС). Франс пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 10 һәм 11 апрелдә Парижда демократик Грецияға ярҙам итеү буйынса халҡ-ара конференция буласаҡ. Конференцияла 60-тан артыҡ делегат, шул иҫәптән, АҠШ, Англия, Польша, Дания, Югославия, Бельгия, Швейцария, Люксембург һәм Австрия вәкилдәре ҡатнашасаҡ. Англия парламенте члены Зиллиакус Грецияла сит илдәрҙең тығылыуы тураһында доклад яһаясаҡ.

ГЕРМАНИЯНЫҢ ҠОРАЛЛЫ КӨСТӘРЕНӘ ҠАРАТА АҠШ ПЛАНДАРЫ ТУРАҺЫНДА «ДЕЙЛИ НЬЮС» ГАЗЕТАҺЫ

НЬЮ-ЙОРК, 2 апрель. (ТАСС). «Дейли ньюс» газетаһы Франко Испанияһын «Маршалл планына» индереү тураһында вәкилдәр палатаһының ҡарарына арналған мәҡәлә баҫып сығарҙы. Мәҡәләлә, айырым алғанда, Ҡушма Штаттар «Маршалл планын» «һалҡың ҡанлы миң-миклелекте нигеҙҙә» «аҡыллы һәм реалистик рәүештә» тормошҡа ашырырға йыйыналалар, тип әйтелә. Быны иҫбатлауҙың беренсе дәлиле шунан тора, — тип яҙа газета, — Франко Ҡушма Штаттарҙың «коммунизмға ҡаршы» көрәшендә ҡатнашасаҡ. Икенсе иҫбат АҠШ-тың Германия ҡоралды көстәрен нығытыуға уйлауынан тора. «Ҡайһы бер сығанаҡтарҙың быны кире ҡағыуҙарына ҡарамаҫтан, — тип яҙа газета,—беҙ Германияның ҡайһы бер юғары хәрби һәләтле бронетанковой һәм эсэсселәр дивизияларын яңынан тыуҙырырға, уларға бик күп аҙыҡ-түлек, Американың юғары сифатлы ҡоралдарын бирергә һәм уларға Америка офицерҙәре етәкселеге аҫтында арергард һуғыштары алып барырға юл ҡуйырға йыйналабыҙ»...

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

Благовещен машиналар төҙөү заводына термист кәрәк. Эш хаҡы түләү килешеү буйынса, квартира бирелә.

Белешеү өсөн адрес: Благовещенск ҡалаһы, кадрҙар бүлеге. Телефон номере 3-08-42.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башкорт академия театрында — «ХӘЖИ ӘФӘНДЕ ӨЙЛӘНӘ». Киске 8 сәғәттә башлана.

Рус драма театрында — «ТАРТЮФ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СОВЕТ БАШҠОРТОСТАНЫ».

«Салауатта» — «ГЕОРГИЙ СААКАДЗЕ».

Матросов исемендәге кинола — «КОНЮК ГОРБУНОК».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-46, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—50-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00118. Өфө газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
№ 70
1948 йыл
7
апрель
шаршамбы
хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВЦСПС президиумында. Профессиональ союздарҙың 1948 йылға бюджеты. (1-се бит).
Беҙҙең республикала. Юғары награда колхоздарҙа, МТС-тарҙа көслө хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. (1-се бит).
Л. Ильичев, В. Степанов. — В. И. Лениндең гениаль философик хеҙмәте. (2—3-сө биттәр).
СОЦИАЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙҘАРЫ. И. Бычков. — МТС директоры Павлов (3-сө бит).
Йәштәрҙең талабы. (3-сө бит).
Яҙ — малдарҙы тарбиялауҙа иң яуаплы осор. Бер генә баш малдың да әрәм булыуына юл ҡуймаҫҡа! Ф. Мальков. — Һыйырҙарҙың һөт бирсәнлеген арттырырға. Йәғфәр Ғәлиев. — Һыйыр нисек Латипова. (4-се бит).
Н. Филатов. — Йәш малдарҙы тулыһынса һаҡларға. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Партия-политик эште хужалыҡ эше менән дөрөҫ яраштырып алып барырға

Бөйөк Ватан һуғышын еңеүҙән һуң, тыныс төҙөлөш осорона күсҡас, ВКП(б) Үҙәк Комитеты партия ойошмаларының хужалыҡ эштәренә етәкселек итеү методын тамырынан үҙгәртеүҙе, партия-политик эште ҡабаттан ҡороуҙы талап итте. Партия эшен сталинса ысул менән халыҡ хужалығын тергеҙеү һәм артабан үҫтереү буйынса ҡуйылған ғәйәт ҙур бурыстарҙы үтәү маҡсатына яраштырып ойоштороу кәрәк булды.

Партияның күптән түгел булып үткән район, ҡала һәм өлкә конференциялары республикалағы партия ойошмаларының күбеһе партияның Үҙәк Комитетының яңы шарттарҙа эшләү тураһындағы күрһәтмәләрен тулыһынса үтәп еткермәүен, партия-политик эштә сериоҙ етешһеҙлектәр булыуын асты. Партия-политик эште хужалыҡ эштәре менән дөрөҫ яраштырып алып бара белмәү йыш осрай. Партияның күп кенә райкомдарының промышленность предприятиеларына, совхоз һәм МТС-тарға яраҡһыҙ метод менән етәкселек итеүҙәре, хужалыҡ ойошмаларының функцияларын үҙ өҫтәренә алыуҙары хаҡында фактлар күрһәтелде.

Партия ойошмалары конференцияларында күп кенә иптәштәр хужалыҡ эштәренә етәкселек итеү методын тамырынан үҙгәртергә кәрәклеген билдәләне. Стәрлетамаҡ ҡалаһының машиналар төҙөү заводы партия ойошмаһы (секретаре иптәш Потапов) үҙ эшен өлгөлө итеп ойошторҙо. Бында директорҙың, цех начальниктарының отчеттары йыйылыштарҙа тыңлана, уларға политик юнәлеш һәм тейешле күрһәтмәләр бирелә, кабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлеше систематик рәүештә тикшерелә. Завод коммунистары партия ойошмаһының ҡарарҙарын, күрһәтмәләрен үтәүҙә тәүҙән эштә етәкселек итәләр, агитационно-массовый эште киң йәйелдерәләр. Был коммунистарға фидакәр хеҙмәткә күтәрелергә, партия-политик эште оло рәүештә хужалыҡ эштәре менән дөрөҫ яраштырып алып барыу юлы менән һөҙөмтәләргә бирҙе. Завод беренсе квартал планын 133 процентҡа үтәне.

Хәҙер был заводтың эшселәре май алды социалистик ярышында тағы ла юғары һөҙөмтәләргә өлгәшергә һүҙ бирҙеләр. Өфө ҡалаһындағы агрегат һәм Черниковск ҡалаһындағы нефть эшкәртеү заводтарының партия ойошмалары ла конференцияларҙа күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлында уңышлы эш алып баралар.

Ләкин өлгөлөгән уңыштар бик аҙ. Иҫкесә эшләү методы менән эшләүсе партия ойошмалары беҙҙә күп әле. Политик эште зарар итеп, хужалыҡ эштәре менән генә шөғөлләнеүсе партия ойошмалары ла осрай. Бындай ойошмалар хужалыҡ органдары урынына эш күреп, хужалыҡ эштәре өсөн яуаплылыҡты үҙ өҫтәренә алалар, улар партия-политик эште киң йәйелдереүгә ваҡыт тапмайҙар. Бындай хәлдә партия ойошмаларының алдына ҡуйылған бурыстар үтәлмәй ҡала, улар ҙа эше етәкселәре аңлап ет-

кәрмәйҙәр. Быға миҫал итеп Ишембайға ҡараған «Ҡәҫәнкүл» промартеленең партия ойошмаһын алырға мөмкин. Бында массовый-политик эш ташландыҡ участка булып тора. Партия ойошмаһының секретары иптәш Шәмсетдинов председателдең хужалыҡ эштәре буйынса урынбаҫары булып эшләгән. Партия контроле булмау һәм политик-массовый эш алып барылмау һөҙөмтәһендә промартель производство планын айҙан-айға үтәп еткермәй. Ғинуар айының планы ни бары 42 процентҡа үтәлде. Февраль, март айҙарында ла үҙгәреш булманы.

Партия етәкселәренең ҡайһы берҙәре икенсе сиккә ташланалар. Мәҫәлән, Салауат районы Хаммат исемендәге колхоз партия ойошмаһының секретары иптәш Баймахаметов «хәҙер беҙ бары тик партия эше менән генә шөғөлләнергә тейешбеҙ, ә хужалыҡ эше менән колхоз председателе етәкселек итһен» тип белдерә. Был хата һәм бик зарарлы ҡараш.

Бер сиктән икенсе сиккә ташланырға ярамай, — тип өйрәтә иптәш Сталин. — Политиканы хужалыҡ эшенән айырып булмай. Беҙ, политиканан ситкә китә алмағандай, хужалыҡ эшен дә ташлап китә алмайбыҙ.

Партияның район һәм ҡала комитеттары бөйөк юлбашсыбыҙҙың был күрһәтмәләрен бер генә минутҡа ла онотырға тейеш түгелдәр. Партия ойошмаларын хужалыҡтағы вак эштәрҙән бушатыу һәм партия-политик эште көсәйтеү — ул хужалыҡ эштәренә етәкселек итеүҙән баш тартыу тигән һүҙ түгел. Бында хужалыҡ ойошмаларының функцияларын тартып алмау тураһында һүҙ бара. Большевистик етәкселек итеү методы хужалыҡ органдарына дөрөҫ юнәлеш биреүҙе һәм билдәләнгән юнәлештең тормошҡа ашырылыуын систематик контроль алып барыуҙы талап итә.

ВКП(б)-ның район һәм ҡала комитеттары совет һәм хужалыҡ ойошмаларына талапты көсәйтергә, тапшырылған эш өсөн уларҙың яуаплылығын күтәрергә тейештәр. Хужалыҡ эштәрен хужалыҡ органдары урынына башҡарыу түгел, ә уларҙың эшенә ярҙам итеү талап ителә.

Партия органдары массалар араһында политик эште көсәйтеүгә ҙур иғтибар бирергә тейештәр. Күп районда йәйелдерелгән агитацион-массовый эш менән хеҙмәтсәндәрҙең производство инициативаһын һәм активлеге күтәрергә, һәр бер кешелә эшкә социалистик ҡараш тәрбиәләргә кәрәк. Был партия ойошмаларының иң мөһим бурысы.

Республиканың халыҡ хужалығы алдында был йылда ҙур бурыстар тора. Партия етәкселәренең был бурыстарҙы үтәү өсөн көрәште ойоштороуҙа, партия-политик эште хужалыҡ эштәре менән дөрөҫ яраштырып алып барыуҙа, партия ойошмаларының иң мөһим эше ул.

ВЦСПС президиумында

Профессиональ союздарҙың 1948 йылға бюджеты

ВЦСПС президиумы профессиональ союздарының 1948 йылға бюджетын раҫланы.

Бюджет профсоюз члендарының культура һәм көн-күрештәрен хеҙмәтләндереүгә ассигнованиены байтаҡ арттырҙы. Был фонд барлыҡ расходтарҙың өстән ике өлөшө самаһын тәшкил итә. Клубтарҙа, культура йорттарында һәм дворецтарында лекциялар, докладтар ойоштороуҙың суммаһы ике тапҡырға яҡын арта. Производство техник пропагандаға ассигнование ике ярымға һәм музейҙар, күргәҙмәләргә экскурсиялар ойоштороу расходтары ике тапҡырҙан күберәккә арттырылды. Профсоюз библиотекаларына китаптар алыу, художестволы үҙэшмәкәр түңәрәктә-

ренең эшен күтәреү, балалар араһында эшләү расходтары үҙған йылға ҡарағанда байтаҡ арттырыласаҡ.

Профсоюздарҙың бюджетында физкультура һәм спорт эштәрен йәйелдереү расходтары ҙур урын тота. Улар, үҙған йылдағы расходтарға ҡарағанда, бер ярым тапҡырға арта.

ВЦСПС президиумы үҙ-ара ярҙам кассаларының әһәмиәте ҙур булыуын билдәләне. Профсоюз ойошмаларына үҙ-ара ярҙам кассаларының эше менән етәкселек итеүҙе ҡырҡа яҡшыртырға һәм бюджетта ҡаралған сумманы тулыһынса үҙ ваҡытында уларға тапшырырға ҡушты.

(ТАСС).

СОВЕТ ДЕЛЕГАЦИЯҺЫНЫҢ ПРАГАҒА ЮБИЛЕЙ ТАНТАНАЛАРЫНА КИТЕҮЕ

5 апрелдә Совет делегацияһы Карлов университетының 600 йыллығына арналған юбилей байрамдарында ҡатнашлыҡ итеү өсөн самолетта Прагаға осоп китте. Делегация составында: Мәскәү Государство университетының ректоры академик А. Н. Несмеянов (етәксе), Киев университеты ректоры В. Г. Бондарчук һәм фәндәр кандидаты С. Н. Шунденко иҙеләр.

Беҙҙең республикала

Коллектив квартал планын үтәне

Башҡортостан аҙыҡ промышленносе Министерствоһына ҡараған Өфө декстрин (елем эшләү) заводы коллективы беренсе квартал производство программаһын 116,3 процентҡа үтәне. Бынан тыш картонаж цехы тарафынан был кварталда 7750 һумлыҡ киң ҡулланыу продукцияһы эшләп сығарылды.

Социалистик ярыш алдынғылары — смена мастерҙары Мөхәмәтвәлиев, Ивановская, Мосунова, аппаратчица Бритоусова, Сәхипова, Торовина, Әсфәндиярова, Спиркина һәм башҡа иптәштәр сменаға 1,3—1,6 норма бирәләр.

Коллектив өлгәшелгән уңыштарын нығытып, май алды социалистик ярышында тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәр биреү өсөн көрәшә.

300 мең һум экономия

Белорет «Автотрактородеталь» заводы үҙған йыл пландан тыш 2 миллион 450 мең һумлыҡ продукция биргәйне.

Быйыл ленинградлыларҙың саҡырыуына яуап итеп, завод продукция эшләп сығарыуҙы үҙған йылға ҡарағанда, 15 процентҡа арттырырға һәм һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡтың өсөнсө йылында государствоға 1 миллион һум файҙа бирергә йөкләмә алды.

«Автотрактородеталь» заводы коллективы алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп килә. Продукция етештереү айҙан-айға арттырып үтәлә. Шуның һөҙөмтәһендә завод 1948 йылдың беренсе кварталында 300 мең һум экономия бирҙе.

Колхоздар өсөн сортлы йәшелсә орлоҡтары

Башҡортостан «Сортсемовощь» конторaһы үҙған йыл республика колхоздарына 1690 центнер сортлы йәшелсә орлоғо һатып биргәйне. Быйыл 2815 центнер йәшелсә орлоғо һатып биреүҙе планлаштырҙы һәм 1 апрелгә был орлоҡтарҙың яртыһынан күберәк өлөшө колхоздарға таратылды ла инде. Бөрө районы колхоздары ғына 70 центнерҙан артыҡ сортлы орлоҡ һатып алдылар.

Хәҙер республиканың райондарында 17 урында сортлы йәшелсә орлоҡтары һатыу урындары булдырылды. Бынан башҡа 17 районда райпотребсоюздар аша колхоздарға кәбеҫтә, сөгөлдөр, ҡыяр, борсаҡ һәм башҡа орлоҡтар һатыу эштәре киң йәйелдерелде.

Ауыл халкы өсөн лекциялар

Республикан лекцион бюро Тәтешле, Бәләбәй, Туймазы, Ғафури, Яңауыл һәм Мәҡәр райондарына лекциялар уҡыу өсөн лекторҙар һәм методистәр ебәрҙе.

Улар биш йыллыҡты пропагандалау буйынса күп кенә лекциялар уҡыясаҡтар һәм урындағы лекторҙарға практик ярҙам күрһәтәсәктәр.

Юғары награда колхоздарҙа, МТС-тарҙа көслө хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы

✪ ✪ ✪ ✪ ✪ ✪

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Стояновтың йөкләмәһе

ДӘҮЛӘКӘН. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Почтальон «1 Мая» колхозына ҡотлау телеграммаһы килтерҙе. Бригадир Александр Васильевич Стояновҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү тураһындағы хәбәр ауылға тиҙ таралды. Тәүге партия ойошмаһы секретаре Ауышев, звеноводтар Нина Яковлева, Александра Маскина һәм башҡалар геройҙы ҙур награда менән тәбрикләйҙәр.

Митинг башлана. Көслө алҡыштар аҫтында трибунаға Социалистик Хеҙмәт Геройы Александр Стоянов күтәрелә.

— Колхоз крәҫтиәндәре тураһында атайҙарса хәстәрлек күргәне өсөн партияға һәм хөкүмәткә, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ҙур рәхмәт, — ти ул. 1948 йылда беҙҙең бригада 400 гектар бойҙайҙың һәм 100 гектар арыштың һәр бер гектарынан уртаса 108-әр бот урожай үҫтерергә йөкләмә ала. Бригада сәсеүгә тулыһынса әҙер. Тунға һөрөп ҡалдырылған 420 гектар еребеҙ бар. Орлоҡ етерлек. Беҙ юғары наградаға яуап итеп, 558 гектар яҙғы сәсеүҙе 10 көн эсендә тамамларға һүҙ бирәбеҙ.

Ғ. Идрисов.

Ярыш йәйелә

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Митинг башланғанға тиклем үк трактористар, трактор бригадаһы бригадирҙары һәм комбайнерҙар Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларынан 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү тураһындағы хәбәрҙе ишеткәйнеләр инде.

Митингыла беренсе булып МТС директоры, СССР Верховный Советы депутаты иптәш Юнусов һүҙ алды.

— Беҙҙең илдә хеҙмәт юғары баһалана. Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыусылар араһында Дәүләкән һәм Баҙан МТС-ы механизаторҙары ла бар. Дәүләкән МТС-ында иптәш Алехин етәкселек иткән трактор бригадаһы үҙған йыл үҙе эшкәрткән 150 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 21,4-әр центнер, ә Баҙан МТС-ында иптәш Рябов бригадаһы 183 гектар майҙанда 22,7-шәр центнер урожай алды. Беҙ быйыл улар өлгөһөндә эшләп, шундай уҡ уңыштарға өлгәшеү өсөн көрәшергә тейешбеҙ, — тине ул.

Митингыла сығып һөйләүсе комсомолец-йәштәр трактор бригадаһы бригадире иптәш Хәсәнов быйылғы сезонда 15 ат көслө һәр бер тракторға меңәр гектар ер эшкәртергә, үҙе эшкәрткән участкала бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 15-әр центнер урожай алырға һүҙ биреп, бөтә трактористарҙы ярышҡа саҡырҙы.

Р. Камалов.

Бөтә трактор бригадалары колхоздарға китте

ҠАНДРА. (Телефон аша). Ҡандра МТС-ы механизаторҙары СССР Верховный Советы Президиумының Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы Указын ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Указға яуап итеп Исламов, Хажиев, Ғәбидуллин, Латипов иптәштәрҙең бригадалары шартлы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртергә, баҫыу эштәренең юғары сифаты өсөн көрәшергә булдылар.

Иптәш Мөхәмәтшин етәкселек иткән трактор бригадаһының йөкләмәһе тағы ла юғарыраҡ, 15 ат көслө һәр бер тракторға — 1100 гектар. Был бригада үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан уртаса 13 центнер урожай алыу өсөн көрәшә.

МТС бөгөндән баҫыу эштәрен башларға әҙер. Хөкүмәт наградаһына яуап итеп, яңы йөкләмәләр алған механизаторҙар машиналары менән колхоздарға килделәр.

Ғ. Ғәзизуллина.

Алдынғы колхозда

Аҫҡын районының Михайловка ауыл Советындағы колхоздар араһында «Ҡыҙыл юл» колхозы сәсеүгә әҙерлекте беренсе булып тамамланы. Ауыл хужалығы инвентарҙары, сбруйҙар тулыһынса ремонтланды, Ә ҡамыттар һәр атҡа икешәр дана әҙерләнде. Сәсеү материалдары ла таҙартылған. Орлоҡтоң сығышы 95—98, дымлылығы 16 процент.

Колхоз ҡышҡы агротехник сараларҙы үткәреүгә ҙур иғтибар итте. Баҫыуға тиреҫ сығарыу планы 180 процентҡа үтәлде. Хәҙер ужымдарҙы аҙыҡландырыу эшенә әҙерлек йәйелдерелде.

— Һәр гектар майҙанда 120-шәр бот арыш урожайы үҫтерергә йөкләмә алдыҡ, — ти баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Абзалов.—Ужымды өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн бөтә нәмә етеш. 42 центнер көл әҙерләнек. Бригада ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫтән ужым баҫыуына сығасаҡ. В. Вакутин.

Өфө еп иләү фабрикаһының комсомолецтары һәм комсомолкалары май алды социалистик ярышына ҡушылып, апрель программаһын 28 апрелгә үтәргә йөкләмә алдылар.
Һүрәттә (һулдан уңға): ватерщицаларҙан В. С. Шабанова, З. Х. Насирова, И. М. Булатова, А. Н. Шилина, Ф. И. Мәғәфурова, М. Х. Басырова иптәштәр.
В. Жданов фотоһы.

Культура йорттарын тәртипкә килтерәләр

Быйыл республиканың 11 районында культура йорттарын йыһазландырыу өсөн 275 мең һум аҡса бүленгән. Был аҡсаға Дәүләкән, Ғафури, Йомағужа, Оло-Тиләк, Ҡариҙел һәм башҡа район культура йорттарына художестволы декарациялар алына. Улар араһында «Ленин Өфөлә», «Сталин һәм Ворошилов», «Сталин һәм Горький» тигән картиналарҙың ҙурайтылған күсермәһе, Ленин, Сталин, Молотов, Жданов, Шверник иптәштәрҙең бюстары, ВКП(б) Үҙәк Комитеты Политбюроһы члендарының портреттары, СССР гербы буласаҡ.

Шуның менән бергә, республиканың культура йорттарына ремонт үткәреүгә лә ҙур иғтибар бирелә. Район культура йорттарына капиталь ремонт үткәреү өсөн 300 мең һум аҡса ҡаралған. Капиталь ремонттар: Воскресен, Өфө, Покровка, Бағалы һәм башҡа район культура йорттарында үткәрелергә тейеш. Район, ҡала библиотекаларына ремонт яһау өсөн 200 мең һум аҡса билдәләнгән.

Шефтың ярҙамы

ӨФӨ. Тау оборудованиелары заводы коллективы үҙе шефлыҡ иткән Абдразаҡ МТС-ына (Ҡыйғы районы) ҙур ярҙам күрһәтә. Слесарь, токарь, тимерселәр бригадаһы тракторҙар ремонтлау осоронда МТС-ҡа барып бер ай эшләп ҡайтты. Ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау өсөн заводтан айырым эшсе бүленде.

Завод МТС-ҡа цистерна, фрезер станогы һәм инструменттар менән ярҙам итә. Яҙғы сәсеү осоронда МТС эшселәре араһында политик-массовый эш алып барыу өсөн завод коммунистарынан айырым бригада ойошторолдо.

САУҘА РАБОТНИКТАРЫ АКТИВЕНЕҢ ӨЛКӘ КӘҢӘШМӘҺЕ

5 апрелдә Башсоюз бинаһында Башҡортостан сауҙа работниктары активының өлкә кәңәшмәһе асылды. Кәңәшмәнең көн тәртибендә «Республика ҡалаларында сауҙа эшен яҡшыртыу саралары» һәм «Яҙғы сәсеүгә әҙерлек» мәсьәләләре тора.

Беренсе мәсьәлә буйынса БАССР сауҙа министры иптәш Липатовтың докладын тыңланды. Доклад буйынса прениеләрҙә Государство сауҙа инспекторы Червяков, Өфө ҡала сауҙа бүлеге мөдире Земцов, Белкин һәм башҡа иптәштәр — бөтәһе ун кеше сығыш яһаны.

ӨФӨ ПРЕДПРИЯТИЕЛАРЫ ӨЛГӨҺӨНДӘ

Белорет металлургия заводының прокатсылары Өфө предприятиелары өлгөһөндә май алды социалистик ярышына ҡушылырға саҡырыу мөрәжәғәт иттеләр һәм апрелдә юғары сифатлы легированный коростоң махсус маркаһын үҙләштерергә, шартлы яғыулыҡ буйынса өс процент экономия яһарға, пландан тыш 400 тонна прокат бирергә тигән йөкләмә алдылар. Был цех башҡа цехтар араһында беренсе булып квартал планын 100,1 процентҡа үтәне. Шул көндәрҙә коллектив цехтың стахановсы-техник планын ҡабул итте һәм бөтә эске резервтарҙы хәрәкәткә килтереү, айлыҡ планды байтаҡ арттырып үтәү бурыстарын ҡуйҙы.

Прокатсыларҙың саҡырыуы миҫалында Белорет тимер юлсылары ярышҡа ҡушылып, апрелдә йөк йөрөтөүҙең тәүлек пландарын үтәп барырға, паровоз-вагондар паркының тотҡарлыҡһыҙ эшләүенә өлгәшергә һүҙ бирҙеләр.

Иртә өлгөрә торған йәшелсәләр

Дим станцияһында республикала иң ҙур булған йәшелсәлек-һөтсөлөк совхозы урынлашҡан. Бында күберәк парник хужалығы. Теплицаларҙа йәшел һуған өлгөрҙө лә инде. Һуғандың 200 килограмм самаһы беренсе партияһы йыйып алынып, Өфө ҡалаһының столовойҙарына оҙатылды. Теплицаларҙа ҡыяр өлгөрә башланы. Хәҙер парниктарҙа үҫтерелгән помидор рассадаларын икенсе урындарға күсереп ултыртыу эштәре башланды.

В. И. Лениндең гениаль философик хеҙмәте

(В. И. Ленин әҫәрҙәренең 14-се томы баҫылып сығыуға ҡарата)

В. И. Лениндең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән күренекле хеҙмәте уның әҫәрҙәренең ун дүртенсе томына ингән. Ленин был китапты 1908 йылдың февралендә яҙа башлап, октябрҙә тамамлаған. Лениндең был китабы 1909 йылдың майында баҫылып сыҡҡан.

Иптәш Сталин 1924 йылда уҡ, Лениндең был гүзәл философик хеҙмәтенә баһа биреп, үҙенең «Ленинизм нигеҙҙәре тураһында» лекцияларында былай тигәйне:

«Лениндең теорияға ошондай юғары әһәмиәт биргәнлегенең иң асыҡ күҙәләнеше итеп, бәлки, бынау фактыны, йәғни Энгельстән алып Ленинға тиклем булған осор эсендә фән биргән нәмәләрҙең иң мөһимдәрен материалистик философия буйынса дөйөмләштереүҙән һәм марксистар араһындағы антиматериалистик ағымдарҙы һәр яҡлап тәнҡитләүҙән торған иң серьез бурысты үтәүгә, бүтән берәү ҙә түгел, бәлки Ленин керешкән икәнлеге фактын һанарға кәрәк булыр ине. Энгельс «һәр бер яңы бөйөк фәнни асыу (открытие) булған һайын материализмға яңы төҫ алырға тура килә», тине. Билдәле, үҙ заманы өсөн был бурысты бүтән берәү ҙә түгел, бәлки үҙенең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән бик айбат китабында, Ленин үтәне» (И. В. Сталин. Әҫәрҙәр, 6-сы том, 90-сы бит).

Лениндең был китабы—большевистик партиялылыҡ һәм һуғышсанлыҡтың күренекле өлгөһө, беҙҙең партиябыҙ эшселәр синыфының асыҡтан-асыҡ һәм маска кейгән дошмандарына ҡаршы, донъяға коммунистик ҡараш дошмандарына ҡаршы һәр ваҡытта алып барған һәм хәҙерге көндә лә алып бара торған килешеүҙе белмәй торған көрәш миҫалы. Лениндең был әҫәренең баҫылып сығыуы большевистик партия өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәтле булды. Ул марксистик партияны теоретик яҡтан әҙерләү һәм марксизм философияһын үҫтереүҙә яңы юғары этап булды.

Лениндең был ҡиммәтле әҫәрендә философия менән политиканың, теория менән практиканың берҙәмлеге айырыуса тәрәнлек һәм асыҡлыҡ менән күҙәләндерелгән, эшселәр синыфы партияһының коммунизм тантанаһы өсөн көрәшендә революцион теорияның әһәмиәте асып бирелгән.

Был әҫәр баҫылып сыҡҡандан алып үткән 40 йыл самаһы ваҡыт — унда булған идеяларҙы иң ҡаты рәүештә һынау һәм тикшереү өсөн тамам етерлек ваҡыт. Ниҙәр булды һуң? Фәндең бик ныҡ үҫеүе, ваҡиғаларға бай булған тормош Ленин идеяларының бөйөк көсөн һәм фәнни яҡтан дөрөҫлөгөн тулыһы менән расланылар.

Донъяға алдынғы ҡараштың ныҡыуы һәм үҫеүе өсөн булған көрәштә, теорияла империалистик реакцияға ҡаршы көрәштә был әҫәр хәҙер ҙә ғәйәт ҙур идея ҡоралы булып тора.

I

В. И. Лениндең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән китабы ниндәй тарихи шарттарҙа майҙанға килде һуң?

1908—1909 йылдар — Россияла тәрән реакция осоро. 1905 йылғы беренсе рус революцияһы эшселәр синыфының ваҡытлыса еңелеүе һәм царизмдең еңеүе менән тамамланды. Хатта тыштан ғына ҡарауға ла демократик булып күренгән бөтә нәмә ҡаты рәүештә эҙәрлекләнде. Рус реакцияһы бөтә фронт буйлап эшселәр синыфына ҡаршы поход иғлан итте; ул пролетариаттың политик һәм экономик ойошмаларын тар-мар итте; хеҙмәтсәндәр ҡара груһ яуыз түрәләрҙең ҡырағай ҡотороноуҙарының бөтә ауырлығын баштарынан кисерҙеләр, инде «Столыпин галстугы» быуҙы, ҡоторонған реакция революцион хәрәкәтте етәксеһеҙ ҡалдырырға теләне. Полиция көсөнә генә түгел, бәлки рухани көсәк тә эшкә ҡушылды.

Ленин, революция еңелгәндән һуң Россиялағы хәлгә характеристика биреп, былай тип яҙҙы:

«Царизм еңде. Бөтә революцион һәм оппозицион партиялар ҡыйратылдылар. Политика урынына төшөнкөлөк, әхлаҡһыҙлыҡ, бүлгеләнеү, тарҡаулыҡ, мөртәтлек (ренегатлыҡ), порнография. Философик идеализмға ынтылыу көсәйеү, контрреволюцион настроениеларҙың тышҡы күренеше булған мистицизм» (Әҫәрҙәр, XXV том, 176-сы бит).

Политик реакция эшселәр синыфына һәм уның донъяға ҡарашына идеологик һөжүм менән бергә алып барылды. Идеологик көрәш бик төрлө формаларҙа булды: әҙәбиәт, искусство, философия, тәбиғи фәндәр — бөтәһе лә революцияға ҡаршы көрәш өсөн файҙаланылды. Модаға эйәреүсе яҙыусылар шайкаһы марксизмде «ләп түҙҙерҙеләр», ике йөҙлөлөк, мөртәтлек, хыянат итеүҙе маҡтанылар. Матур әҙәбиәткә мракобестар хужа булдылар, улар, «шәхескә табыныу» тигән булып, еҫесен аҙғынлыҡты маҡтанылар. Әҙәбиәттә төрлө декаденттар, формалистар, символистар группалары эш күрһәтергә тырыштылар, улар үҙ әҫәрҙәренең халыҡҡа ҡаршы булған йөкмәткеһен искусствола, әҙәбиәттә идеяһыҙлыҡҡа, тышҡы матурлыҡҡа өндәү менән ҡапландылар. «Вехи» тигән әҙәби йыйынтыҡта Гершензон, Струве, Булгаков интеллигенцияны революцияны емерергә саҡырҙылар. Петербургта, «Дини-философик общество» үҙенең эшен һәйен сберҙе, ул алла эҙләүселек тигән нәмәнең оясына әйләнде, был обществоның етәкселәре мистик Мережковский һәм салон шағире Гиппиус асыҡтан-асыҡ революцияға ҡаршы сыҡтылар, революцияны дәжжәл тип атап, философик материализмға ҡаршы көрәш йәйелдерҙеләр.

Төшөнкөлөк настроениелары һәм революция көсөнә ышанмау партиялы интеллигенттарҙың марксистик позицияларҙа ныҡ тормаған ҡайһы бер өлөшөн солғап ала. Луначарский алла эҙләүселек ағымына яҡын торған алла яһаусылыҡҡа етәкселек итә. Үҙҙәрен марксист тип һанаған бер төркөм интеллигенттар — Богданов, Базаров (1905 йылда большевиктарға ҡушылыусылар), Юшкевич, Валентинов (меньшевиктар), Чернов (эсер) — берҙәм фронт булып марксизмдең философик-теоретик һәм фәнни-тарихи нигеҙҙәренә ҡаршы сығалар. Тыштан ҡарағанда уларҙың сығыштары марксизмде һәм уны артабан үҫтереүҙе яҡлау флагы аҫтында бара. Ләкин ул маскировка ғына була, сөнки улар ысынында марксизмде, уның теоретик нигеҙҙәрен емереү, юҡ итеү, марксизмде реакцион идеалистик философия — махизм менән алмаштырырға теләйҙәр. Марксизмде былдай ике йөҙлө тәнҡитләү бигерәк тә ҡурҡыныслы була. Сөнки уның партияның теоретик яҡтан әҙерлеге булмаған рядовой членддарын аҙаштырыуы мөмкин ине һәм реакцияның дөйөм фронтын көсәйтте.

Ленин һәм Сталин тарафынан етәкселек ителгән большевиктар марксизмдең берҙән-бер эҙмә-эҙлекле тарафтарҙары булдылар, реакцияға ҡаршы көрәштә улар партияның бик ҡиммәтле хазинаһын — революцион теорияны һаҡлап алып ҡалдылар.

Беренсе рус революцияһы еңелгәндән һуңғы осорҙа теория мәсьәләләре ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булды. Һис кисектерелмәй торған бурыс — марксизмде һәлак итергә маташыусыларҙың ялған маскаһын алып ташлау, уларҙы тамам фаш итеү, уларҙың эске һәм халыҡ-ара реакция менән булған бәйләнештәрен күрһәтеү, марксизмдең теоретик нигеҙҙәрен — диалектик һәм тарихи материализмде һаҡлап алып ҡалыу алға килеп баҫты.

Был бурысты В. И. Ленин үҙенең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән гениаль әҫәрендә үтәне.

1908 йылда «Марксизм философияһы буйынса очерктар» тигән йыйынтыҡ сыға. Ленин әйткәнсә, уны «Марксизм философияһына ҡаршы очерктар» тип атау дөрөҫерәк булыр ине. Бына шул йыйынтыҡтың сығыуы Лениндең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән әҫәрен яҙырға сәбәп булды. «Марксизм философияһы буйынса очерктар» тигән йыйынтыҡҡа ревизионистар һәм перерожденецтар тарафынан яҙылған мәҡәләләр инделә. Улар үҙҙәренең мәҡәләләрендә «эшләнмәгән материализмдән» («серый материализм») ҡотолоуҙы талап итәләр, диалектиканы «мистика» тип һанайҙар һ. б. Марксизмде «аныҡлау» һәм «үҫтереү» флагы аҫтында, нәфисләндерелгән һәм есән матур итеп күрһәтелгән идеализмде һөйрәп индерҙеләр, фән тигән булып, буталсыҡ һәм реакцион нәмәләр тәҡдим иттеләр.

Марксизмде уға уның дошмандары тарафынан яғылған нәмәләрҙән таҙартыу өсөн, революцион хәрәкәт практикаһын теоретик яҡтан төшөнөү өсөн, фән тарафынан тупланған тәжрибәне дөйөмләштереү һәм донъяға марксистарса ҡарашты тулы итеп аңлатыу өсөн, Ленин «философик яҡтан тикшереп ҡарауҙарҙың» кәрәклеген был «очерктар» сыҡҡандан күп элек үк яҡшы төшөнә ине. Быларҙың бөтәһе эшселәр синыфының империализм шарттарында политик көрәшкә теоретик яҡтан әҙерләү, партияны революцион көрәштең закондарын белеү менән ҡоралландырыу, уның синфи көрәштең ҡатмарлы шарттарында ориентация тота белеүгә өйрәтеү өсөн талап ителә ине.

Лениндең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән әҫәре яңы типтағы партияны идеологик, ойоштороу һәм тактик яҡтан әҙерләү булып торған «Ни нәмә эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Демократик революцияла социал-демократияның ике тактикаһы» тигән әҫәрҙәре инде донъяға сыҡҡандан һуң яҙылды. «Материализм һәм эмпириокритицизм» партияны теоретик яҡтан әҙерләү булды.

Ленин үҙенең был китабында философик реакционерҙарҙы тамам тар-мар итеү менән генә сикләнмәне, бәлки коммунизмдең теоретик фундаментын, большевистик партияның теоретик нигеҙҙәрен һаҡлап алып ҡалды, тотош бер тарихи осорҙа фән тарафынан барлыҡҡа килтерелгән нәмәләрҙең иң мөһимен гениаль рәүештә дөйөмләштерҙе.

Лениндең һәм большевиктарҙың марксистик теория өсөн рус ревизионистарына һәм перерожденецтарына ҡаршы көрәшеүҙәренең халыҡ-ара әһәмиәте булды. Марксизмдән артҡа киткән, ликвидаторлыҡ һәм отзовизмде идеологик яҡтан күҙәләндереүселәр булып тороусыларҙы фаш итеп, Ленин бер үк ваҡытта халыҡ-ара ревизионизмдең теоретик нигеҙҙәренә емергес удар һиҙаны.

II

Ленин «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән әҫәрендә: марксизмде тәнҡитләүсе рус тәнҡитселәре оригиналь түгел, уларҙың ҡарашы нигеҙендә ул ваҡытта Көнбайышта модала булған реакцион философия—махизм ята, тип күрһәтте.

Рус махистәре, ҡолдарса түбәнселек күрһәтеп, үҙҙәренең уҡытыусылары булған Мах һәм Авенариусты ҡабатланылар, уларҙың субъектив идеализменең төп положениеларын бөтөнләй күсереп алып, был положениеларға «иң яңы философия» төҫө бирергә маташтылар. Ленин «философиялағы яңы юнәлеш» уйлап сығарыусыларҙан бик ныҡ көлдө, уларҙы «мода [illegible] (Әҫәрҙәр, 14-се том, 82-се бит).

Идеалистик философияның бер төрө булған махизм реакцияның һәм поповщинаның ҡоралы [illegible]

[illegible]

Эшселәр синыфы дошмандарына ҡаршы көрәштә Маркс һәм Энгельстең [illegible] (Әҫәрҙәр, 14-се том, 324-се бит). [illegible] традиция тип һананы.

Партияны ойоштороусылар һәм уның юлбашсылары — Ленин һәм Сталин [illegible]

[illegible] Жданов [illegible] түгел үткәрелгән философия дискуссияһында.

Философиялағы махистик реакционерҙарҙың ялған һәм жуликтарса булған хәйләләрен фаш итеп, Ленин уларҙы поповщинаға димләүселәр тип иҫбат итә. Төрлө һүҙҙәр пәрҙәһе аҫтынан, схоластиканан Ленин һәр ваҡытта философиялағы ике төп һыҙыҡты, ике төп юнәлеште — материализмде һәм идеализмде тапты һәм уларҙы табырға өйрәтте.

Философияла төп ике ағымға иғтибар итмәгән кеше ҡотолғоһоҙ рәүештә ләғнәтләнгән урталыҡ партияһына, тәмһеҙ вегетарианлыҡҡа, буржуаз объективизмға табан тәгәрәй. Философиялағы ике партия- [illegible]

[illegible] Дьюи, Рассел, Сартр, Кроче [illegible] Бевин, Блюм, Реннер, Шумахер [illegible] Улар дин, мистика һәм идеализмдең бөтә арсеналын үҙҙәренә ҡорал итеп файҙаланалар.

Общество үҫешенең тарихи тәжрибәһе марксистик диалектик методтың һәм философик материализмдең бөтә нәмәне еңеүсе бөйөк көсөн бөтә донъяға күрһәтте.

III

Ленин үҙ китабының беренсе өс главаһында махизмдең таныу теорияһын селпәрәмә килтереп ҡыйрата һәм диалектик материализмдең таныу теорияһын уға ҡаршы ҡуя, диалектик материализмдең таныу теорияһын фәнни яҡтан үҫтерә һәм нығыта.

Философияның төп мәсьәләһен — фекер йөрөтөүҙең бытиеға ҡарата мөнәсәбәте тураһындағы мәсьәләне — хәл иткәндә материализм, идеализмға, шул иҫәптән махизмға ҡапма-ҡаршы буларак, материаль донъя беҙҙән тыш һәм беҙҙән бойондороҡһоҙ рәүештә йәшәй, материя, бытие — тәүге әйбер, рух, аң — икенсе тигән нигеҙҙән сығып эш итә. Диалектик материализм: беҙҙең фекер йөрөтөүебеҙ ысын донъяны таный аламы?, ысын донъяны беҙҙең күҙ алдыбыҙға килтереүҙәребеҙ һәм уны аңлауыбыҙ уның дөрөҫ сағылышы була аламы? тигән мәсьәләгә ыңғай яуап бирә.

Кешенең фекер йөрөтөүе, марксистик материализм өйрәткәнсә, үҙенең тәбиғәте буйынса объектив донъяны аңларға булдыҡлы. Тәбиғәт тураһында практика менән дөрөҫләнгән беҙҙең белемдәребеҙ объектив хәҡиҡәттәр әһәмиәтенә эйә.

Кешенең тышҡы донъяны таныу процесенең нигеҙе һәм таныуҙың ысын булыуының критерийы булып общественный практика тора. Тормош, практика ҡараш нөктәһе таныу теорияһының беренсе һәм төп ҡараш нөктәһе булырға тейеш.

Ленин үҙенең китабында, сәбәплелек, кәрәклелек, законлы рәүештә булыу идеяһы тәбиғәт, тышҡы донъя закондарының кеше башындағы сағылышы, тип күрһәтә. Махистар иһә субъектив идеалистик ҡараш нөктәһен үткәреп килделәр. Улар өсөн тәбиғәттең үҫеш закондары объектив рәүештә йәшәмәйҙәр, йәғни тәбиғәттең үҙендә йәки обществола йәшәмәйҙәр, бәлки аңда, аҡылда ғына йәшәйҙәр.

Ленин сәбәплелек мәсьәләһендәге субъективистик һыҙыҡ, тәртип һәм кәрәклелекте тышҡы объектив донъянан түгел, бәлки аңдан, аҡылдан, логиканан һ. б. килтереп сығарыу кешеләрҙең аҡылын тәбиғәттән айырыу ғына түгел, беренсене икенсегә ҡаршы ҡуйыу ғына түгел, бәлки аҡылды тәбиғәттең бер киҫәге тип иҫәпләү урынына, тәбиғәтте аҡылдың бер киҫәге яһай, тип күрһәтте.

Марксистик материализм, тәбиғәттең үҫеү закондары объектив: тәбиғәттең үҫеүенә тәртип һәм кәрәклелекте кеше индермәй, ә тәбиғәттең үҙенең законлы рәүештә үҫеш барышы кешенең аңында сағыла, тип өйрәтә.

Ленин махистарға ҡаршы көрәштә азатлыҡ һәм кәрәклелек тураһындағы диалектик-материалистик учениены яҡлай һәм уны үҫтерә. Азатлыҡ—танылған кәрәклелек ул, марксизмдең положениеһы ана шулай.

Тәбиғәт һәм обществоның үҫеү закондары ни тиклем тәрәнерәк танылһалар, кешеләрҙең хәрәкәттәре шул тиклем иреклерәк буласаҡ. Беҙ тәбиғәт закондарын белмәйбеҙ икән, беҙ тәбиғәт ҡолдары булып ҡалабыҙ.

— «Энгельстең, — ти Ленин, — кешеләрҙең бөтә йәнле практикаһы таныу теорияһының эсенә инеп, хәҡиҡәттең объектив критерийын бирә: беҙ тәбиғәт законын белмәйбеҙ икән, ул закон, беҙҙең аңдан башҡа, беҙҙең аңдан ситтә йәшәп һәм хәрәкәт итеп, беҙҙе «һуҡыр кәрәклелек» ҡолдары яһай» (Әҫәрҙәр, 14-се том, 177-се бит). Ләкин беҙ хәҡиҡәт критерийы булған практика нигеҙендә тәбиғәт үҫеше закондарын белгәс, беҙ тәбиғәт хужаларына әйләнәбеҙ.

Ленин махизмде таныу теорияһы мәсьәләләрендә генә тәнҡит итеү менән сикләнмәне, ул уларҙың бөтә философик концепцияһын, шул иҫәптән, уларҙың общественный фәндәр өлкәһенә экскурстарын да системалы эҙмә-эҙлекле рәүештә тәнҡит итте. «Борролмалы һүҙҙәрҙән торған претензиялылыҡ, силлогистикала көтөгеп табылған хәйләләр, нескәләндерелгән схоластика — бер һүҙ менән әйткәндә, гносеологияла ла, социологияла ла бер үк нәмәләр, шундай уҡ ҡысҡырып торған вывеска артына йәшерелгән шул уҡ реакцион йөкмәтке». (308-се бит).

Ленин Богдановтың марксизмде эмпириокритицизм рухында «төҙәтергә» һәм «үҫтерергә» маташыуҙарын фаш итә һәм уға көлә. Богданов, үҙенең сит илдәрҙәге махист остаздарына эйәреп, бытие менән фекер йөрөтөүҙе бер нәмә тип өндәп, асыҡтан-асыҡ идеализмға тәгәрәгән. Ғөмүмән бытие менән ғөмүмән фекер йөрөтөү бер нәмә булмаған кеүек, тине Ленин, общественный бытие менән общественный фекер йөрөтөү ҙә бер нәмә түгел. Маркс учениеһы, общественный фекер йөрөтөү общественный бытиене сағылдыра, тип өйрәтә.

Ғөмүмән материализм кешеләрҙең фекер йөрөтөүҙәренән, тойғоларынан, тәжрибәләренән һ. б. бойондороҡһоҙ, объектив, реаль бытиене таныған кеүек, тарихи материализм да общественный бытиене кешенең общественный фекер йөрөтөүенән бойондороҡһоҙ тип таный. Фекер йөрөтөү тегендә лә, бында ла—бытиенең сағылышы ғына. Диалектик һәм тарихи материализм марксистик философияның бөтөн һәм төҙөк бер системаһын тәшкил итә. Марксизм философияһында, — ти Ленин:

> «объектив хәҡиҡәттән ситкә китмәйенсә, буржуаз-реакцион ялған ҡосағына төшмәйенсә, бер киҫәк ҡорростан ҡойолған марксизм философияһынан бер генә төп фекерҙе лә, бер генә мөһим киҫәкте лә айырып алыу мөмкин түгел». (312-се бит).

Буржуаз философтар бөтә көс менән кешенең аңын ҡараңғылатырға, кешелекте мистицизм ҡараңғылығына индерергә, массаларҙы капиталистик ҡоллоҡ иҙеүенән азат булыуға ышаныуҙарынан мәхрүм итергә тырышалар. Фәнни хәҡиҡәтте, общественный тормоштоң объектив законлылығын кире ҡағыу, субъективизм һәм фекерҙең тамам тарҡалыуы кеүек махизм өсөн характерлы булған нәмәләр реакцион буржуаз философияның яңы ағымдары өсөн дә хас.

Лениндең был бөйөк хеҙмәте — империализмдең философлыҡ итеүсе хәҙерге заман лакейҙарына ҡаршы көрәштә тамам ҡыйратҡыс ҡорал.

IV

Ленин, философик юнәлеш булған махизм физикалағы билдәле бер мәктәп менән идея яғынан бәйләнешле; махистар философияһын физик дәрт менән ҡыҙыҡлаштыра торған дөйөм нәмә—ул да булһа философик идеализм, тип күрһәтә. Махизмде, уның яңы физика менән һис шикһеҙ булған бәйләнешенә иғтибар итмәйенсә тикшереү, философик теорияларҙы тәбиғәт белеме менән үҙ-ара бәйләнештә тикшереп ҡарауҙы талап итеүсе диалектик материализмдең рухын мыҫҡыл итеү, тигән һүҙ.

XIX быуат аҙағында һәм XX быуат башында физикала бик ҙур нәмәләр уйлап сығарылды: электрон асылды, радиоактивность күренеше асылды, элементтарҙың әүерелеүҙәре билдәләнде. Ленин тәбиғәт белемендә революция тип атаған был уйлап сығарыуҙар матдәләр (вещество) төҙөлешенә элекке ҡараштарҙы бөтөнләй үҙгәртте, атомдарҙың бүлгеләнмәүе һәм үҙгәрмәүе тураһындағы метафизик ҡараштарҙы емерҙе, материя тураһындағы физик учениеларҙы киңәйтте һәм байытты. Ләкин физик-специалистарҙың байтаҡ бер төркөмө яңы уйлап сығарылған нәмәләрҙең асылын аңламаны һәм тәбиғәт белемендә яһалған революциянан хата һығымталар яһаны. Таныуҙың материалистик теорияһын белмәгәнлектән, абсолют хәҡиҡәт һәм сағыштырмаса хәҡиҡәт мөнәсәбәттәрен аңламағанлыҡтан улар, фәндең прогресе элек урынлашҡан догмаларҙы емергәс, аптырап ҡалдылар. Материя төҙөлеше тураһында объектив донъяны таныуҙа билдәле бер баҫҡысты ғына сағылдырыусы иҫке теорияларҙы ташлау кәрәклеге алдына килтереп ҡуйылған күп кенә физиктар шуның менән бергә ғөмүмән донъяның материаль булыуын таныуҙан да баш тарттылар, материяның объектив реаллек булыу яғынан юҡ булыуы тураһында мәғәнәһеҙ һығымтаға килделәр, философик идеализмға тәгәрәнеләр, реакцион философик мәктәптәр табышына әйләнделәр.

(Аҙағы 3-сө биттә).

В. И. Лениндең гениаль философик хеҙмәте

(В. И. Ленин Әҫәрҙәренең 14-се томы баҫылып сығыуға ҡарата)

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

«Яңы физика идеализмға, башлыса, шуның өсөн тайпылды, сөнки физиктар диалектиканы белмәйҙәр ине» — тип күрһәтте Ленин. (248—249-сы биттәр).

Ленин, физик идеализмде тәнкитләү менән бер үк ваҡытта, таныу теорияһының төп мәсьәләләрен материалистик нигеҙҙәрҙә гениаль рәүештә хәл итте, ул мәсьәләләр тәбиғәт өйрәнеүсе буржуаз ғалимдар һәм философтар өсөн абыныусы таш булдылар. Ленин махистарҙың теоретик буталсыҡтарының төп сәбәптәренең береһе материяның философик төшөнсәһе менән физик төшөнсәһе тураһындағы айырманы аңламауҙары асып бирҙе. Ленин материяның тураһында классик билдәләнеш бирҙе:

«Материя — объектив реаллекте билдәләү өсөн философик категория ул, материя кешегә уның тойғоларында бирелә, ул беҙҙең тойғоларыбыҙҙан бәйһеҙ йәшәй, … күсерелә, фотографлана, сағыла» (117-се бит).

Материяның философик билдәләнеше материяның төҙөлеше, структураһы тураһындағы даими үҙгәреп тора торған тәбиғи-фәнни ҡараштарға ҡағылмай. Материализм менән идеализм араһындағы төп айырма беҙҙең таныуыбыҙҙың сығанағы тураһындағы, объектив реаллек булған материяға ҡарата таныуҙың мөнәсәбәте тураһындағы мәсьәләне хәл итеүҙән тора.

Күп кенә философтар, материяны физик һәм философик яҡтан бутап, материяның структураһы, төҙөлеше тураһындағы ҡайһы бер тәбиғи-фәнни ҡараштарҙың һәләк булыуында объектив реаллек һәләкәтен күрҙеләр һәм идеализм позицияһына күстеләр.

Махистарҙы фаш итеп, Ленин һәр яңы фәнни уйлап сығарыу диалектик материализмде дөрөҫләй генә, уға яңы триумфтар ғына килтерә, тип күрһәтте. Диалектик материализм, кешеләрҙең таныуы һәр ваҡыт үҫә һәм тәрәнәйә, һәм әгәр ҙә кисә беҙҙең таныуыбыҙ атомдан алыҫ китмәгән икән, бөгөн электрондан һәм эфирҙан алыҫҡа китә, тип өйрәтә.

«Диалектик материализм тәбиғәтте кешеләрҙең прогрессив барған фән тарафынан танып белеүҙең бөтә барлыҡ маяҡтарының ваҡытлы, сағыштырмаса, сама менән алынған характерҙа булыуы яғында нык тора. Электрон да, атом кеүек үк, тәбиғәтте таныу бөтөрөү түгел, тәбиғәт икһеҙ-сикһеҙ, ләкин ул икһеҙ-сикһеҙ йәшәй, һәм уның кешенән аңынан һәм тойғоһынан тыш йәшәгән шулай … һәм … тәбиғәтте таныу диалектик материализмде релятивистик агностицизмдан һәм идеализмдан айырып тора ла». (249-сы бит).

Тәбиғәттең бөтә объекттарының иге-сиге булмау һәм бөтмәҫтәкәнлеге булыуы, кешенең донъяны таныу барышта икһеҙ-сикһеҙ һәләтле булыуы тураһындағы Ленинсе уйҙе таныуҙың сиктәре булыуы тураһындағы, кешеләрҙең аҡылы өсөн танылмай торған нәмәләр йәшәүе тураһындағы тар маҡсатлы буржуаз ҡараштарҙы һеперә ташлай.

Ленин тәбиғәт белемендәге идеализмдең философик идеализм менән бәйләнешен бик күп фактик материалдар менән иҫбат итә. Был бәйләнеште асып, физикалағы кризисте материализмға кире ҡайтыу һәм идеализм урынлаштырыу маҡсаты өсөн файҙаланған реакционерҙарҙы фаш итеп, Ленин тәбиғәтте өйрәнеүсе ғалимдарҙың бер өлөшө араһында реакцион философия яғына килеп сыҡҡан тайпылыш — «ҡаҙауылы заг-заг, тарихтағы тиҙ үтеп китеүсән ауырыу өсөр, үҫе төшөнсәләргә … рәүеште … килеп сыҡҡан үҫеү ауырыуы ул», тип күрһәтте.

Ленин физикалағы төп ике юнәлеш араһындағы — материяның барлығын кире ҡағыусы, поповсылыҡҡа, фидеизмға юл һалыусы асыҡтан-асыҡ спиритуалистар менән донъяға стихиялы-материалистик ҡараштағы, ләкин әле диалектик материализмға аңлап етмәгән тәбиғәт өйрәнеүселәр араһындағы айырманы ҡаты көрәште асып бирҙе. Тәбиғәт өйрәнеүселәрҙең, шул иҫәптән физиктарҙың, күпселеге материализм яғында тора, уларҙың тышҡы донъяның объектив реаллеге тураһындағы стихия рәүешендәге ышаныуҙарын Ленин «тәбиғи-тарихи материализм», тип характерланы.

Идеалистарҙың, материя төҙөлеше өлкәһендәге яңы уйлап сығарыуҙар нигеҙендә материализмде кире ҡағырға, тип маташыуҙарын фаш итеп, Ленин бер үк ваҡытта диалектик материализмдең дөрөҫлөгөн бөтә тулылығы менән бик яҡшы итеп раҫлайҙар, тип күрһәтте, Ленин, хәҙерге заман физикаһы материяны таныуға яңы, тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелә һәм хәҙер ул кисерә торған кризис сиең сығыласағын, тип күрһәтте.

«Физиканың материалистик төп рухы, — тип яҙҙы Ленин, — хәҙерге замандың бөтә тәбиғәт белеме рухы кеүек үк, бөтә һәм һәр төрлө кризистәрҙе еңәсәк, ләкин метафизик материализмде диалектик материализмға һис шикһеҙ алмаштырыу менән еңәсәк». (292-се бит).

Физиканың бөйөк уйлап сығарыуҙарын дөйөмләштереп, Ленин шулар менән бергә фәндең үҫеү юлын бер эпохаға алға философтарса яҡтыртты.

Хәҙерге заман физикаһы, атом ядроһының эсенә үтеп инеп, тәбиғәттең һәр бер күренешенең икһеҙ-сикһеҙ булмауы тураһында Лениндең гениаль фекеренең бөйөк әһәмиәтен демонстрацияланы. Материяның ҡаршылыҡлы тәбиғәте тураһындағы, ваҡыт һәм пространствоның берҙәмлеге тураһындағы, материя менән хәрәкәттең бер-береһенән айырылмауы тураһындағы учениелар, иң яңы физик теория тарафынан алға һөрәлгән был учениелар, материалистик диалектиканың триумфы булып, хәҙерге заман физикаһы «диалектик материализмде тыуҙыра» тигән Ленинсе раҫлауҙы булып тора. Ләкин был процесс һалмаҡ эволюция юлы менән түгел, ә бик ҡаты көрәш менән бара.

Фәндә идеалистик лагерь менән материалистик лагерь араһында ҡырҡа көрәш үҫә барыуы көс менән дауам итә. Тарҡалыусы буржуаз общество үҙенең бысраҡ һулышы менән фәндә агностицизм, мистика, тәрән пессимизм, кешеләрҙе … Агностицизмға … Эддингтон, Бор, Гейзенберг кеүек физиктар тарафынан алға ҡуйыла торған был учениелар, поповщина һәм фидеизм менән … хеҙмәт итәләр. Хәҙер ҙә, бынан 40 йыл элек булған кеүек үк, марксистик философия алдында буржуаз фәндә дөйөм булған идеалистик ағымдарҙы аяуһыҙ фаш итеү бурысы тора. Лениндең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән китабы ғалимдарҙы, фәнде поповщина … идеалистарға ҡаршы көрәштә ярҙам итә. Тәбиғәтте өйрәнеүселәргә беҙҙең дөрөҫ фәнни теорияға — кешеләрҙең таныуының иң юғары нөктәһе булған диалектик материализмға эйә булырға ярҙам итә.

* * *

Лениндең философик китабына баһа биреп бөтәрерлек түгел. Уның буйынса большевистик ҡарашҡа өйрәнделәр һәм өйрәнәләр. Беренсе һүҙенән алып аҙаҡҡы һүҙенә тиклем большевистик партиялылыҡ, һуғышсаҡлыҡ һәм революцион тәнҡит менән һуғарылған был китап философиялағы хәҙерге идеалистик ағымдарға ҡаршы көрәштә үткер ҡорал булып тора.

Лениндең мәңге йәшәйәсәк идеялары уның эшен дауам иттереүсе бөйөк Сталиндең классик хеҙмәтендә, уның «Диалектик һәм тарихи материализм» тигән әҫәрендә артабан үҫтерелделәр. Ленин үҙенең «Материализм һәм эмпириокритицизм» тигән китабында Энгельс үлгәндән һуңғы тотош бер тарихи осор эсендә фән тарафынан бирелгән бөтә нәмәне дөйөмләштергән кеүек, иптәш Сталин дә үҙенең хеҙмәтендә Лениндең был китабы сыҡҡандан һуңғы бөтә осор эсендә фән һәм революцион көрәш тәжрибәһе биргән бөтә нәмәне теоретик яҡтан дөйөмләштерҙе һәм марксистик теорияның үҫешен алға ебәрҙе.

«БКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсында», «Диалектик һәм тарихи материализм» тигән бүлектә диалектик һәм тарихи материализм нигеҙҙәре үтә асыҡ һәм ҡыҫҡа формала гениаль рәүештә һөйләп бирелгән. Был хеҙмәтендә иптәш Сталин диалектик метод һәм материалистик теория тураһындағы учениеға Маркс, Энгельс һәм Ленин индергән нәмәләрҙең бөтәһен дөйөмләштерҙе, диалектик һәм тарихи материализм учениеһен фәндең һәм революцион практиканың иң яңы мәғлүмәттәре нигеҙендә артабан үҫтерҙе.

Иптәш Сталин диалектик материализмде коммунизмдең теоретик нигеҙе сифатында, марксистик-ленинсе партияның донъяға ҡарашы сифатында, эшселәр синыфын пролетариат диктатураһын яулап алыу һәм коммунизм төҙөү өсөн көрәшендә идея яғынан ҡоралландыра торған ҡарашы сифатында алға үҫтерә. Марксизм-ленинизм философияһы менән большевиктар партияһының практик революцион эшмәкәрлеге араһындағы эске бәйләнеш был әҫәрҙә айырата көс менән күрһәтеп бирелгән. Политикала яңылышмаҫ өсөн марксистик диалектик метод положениеларен ҡулланып эш итергә кәрәк, тарихи үҫеш закондарын белергә кәрәк, тип өйрәтә иптәш Сталин.

И. В. Сталиндең «Диалектик һәм тарихи материализм тураһындағы» әҫәре, марксистик-диалектик методтың тиңдәшһеҙ оҫтаһы тарафынан яҙылған, большевизмдең бик ҙур практик һәм теоретик тәжрибәһен дөйөмләштереүсе был әҫәр, диалектик материализмде яңы, юғары баҫҡысҡа күтәрә, марксистик-ленинсе философик фекерҙең ысын-ысынлап юғары өлгәшеүе булып тора» (Иосиф Виссарионович Сталин, Ҡыҫҡаса биография, 164—165-се бит).

Ленин һәм Сталиндең бөйөк теоретик хеҙмәттәре быуаттар буйына йәшәйәсәк. Был хеҙмәттәр буйынса донъяға дөрөҫ ҡарашҡа миллион һәм миллион кешеләр өйрәнәләр һәм өйрәнәсәктәр. Ленин һәм Сталиндең мәңге йәшәйәсәк идеялары менән миллионларса кешеләр коммунистик общество төҙөү өсөн көрәшкә рухланалар һәм рухланасаҡтар.

Л. Ильичев.
В. Степанов.

(«Культура и жизнь» газетаһынан).

Ҡыҙыҡлы археологик материалдар

БАКУ. (ТАСС). Мингечаур гидроузелы төҙөлөү урынында, борон заманда торған быуатында күмелеп ҡалған хазиналар табылыуы тураһында был тиклем материалдарға … Шул ваҡытта уҡ ғалимдар бик борон заманда был урында тарихта билдәле булмаған ҡала … бер нисә йөҙ йылдар буйынса йәшәгәнлеге тураһындағы фекерҙе әйткәйнеләр.

Хәҙер ошо фекерҙе дөрөҫләй торған яңы дәлилдәр асылды. Әзербайжан фәндәр Академияһының археологик экспедицияһы, тикшереүҙе үткәргән ваҡытында, урта быуатта төҙөлгән торлаҡ тапты. Уның эсендә яҙмалары VIII быуаттың аҙағына, IX быуаттың башына ҡайтып ҡалған көмөш һәм алтын аҡсалар табылды. Булмаларҙың стеналарында ҡыҙыл … орнаментлар менән биҙәлгән … Уға яҡын урында … Был табылмалар Әзербайжан халҡының культураһын өйрәнеү өсөн ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар.

Колхоздарҙа автобустар

Великие Луки өлкәһенең тимер юлдан алыҫ булған райондары һәм колхоздары араһында автобус бәйләнеше булдырылды. Автобустар өлкәнең үҙ магистраленда йөрөй. Автобус юлының оҙонлоғо 500 километрҙан артыҡ.

300 мең тегеү машинаһы

Подольск механик заводы ағымдағы йылда 300 мең тегеү машинаһы эшләп сығарасаҡ. Машиналар эшләп сығарыу, үҙған йылға ҡарағанда, ағымдағы йылда 65 процентҡа артты. (ТАСС).

Социалистик Хеҙмәт Геройы

МТС директоры Павлов

1929 йылда ул Ҡыҙыл Армиянан демобилизацияланып ҡайтты. Армия сафында ихтыярын сыныҡтырған, приказдарҙы теүәл үтәргә өйрәнгән йәш коммунист Федор Павлов Башҡортостанға, тыуған ауылына ҡайтыу менән бөтә халыҡ эшенә — ауыл хужалығын коллективләштереү эшенә тотонды. Колхоздар төҙөүҙә, кулактарға ҡаршы көрәштә ул алдынғы сафта булды. Бына колхоз ойошторолдо, һәм уны председатель итеп һайланылар.

Совет Хөкүмәте күмәк хужалыҡ юлына баҫҡан крәҫтиәндәргә һәр яҡлап ярҙам итте. Ауылға яңы сәскестәр, һабандар, тырмалар, триерҙар килде. Исимово ауылына трактор килгән көн айырыуса ныҡ иҫтә ҡалды. Павлов тракторға ҙур мөхәббәт менән ҡараны һәм уның янынан оҙаҡ китә алмай торҙо. Баҫыуға сыҡҡан тәүге көндә үк өс төрәнле һабан таҡҡан трактор колхозда бөтә аттар һөрә алғанға ҡарағанда ла, күберәк эшләне.

Ҡеүәтле машинаға ҡарап, Федор Максимович колхоздың киләсәген шунда уҡ күҙ алдына килтерҙе. Эйе, ул киләсәк һөҡландырғыс. Был машина менән хатта бер йыл эсендә генә сәсеү майҙанын өс тапҡырға арттырып була. Бер теләк тыуҙы — МТС-ҡа барып эшкә инергә, техникаға эйә булып, уның ярҙамында баҫыуҙарҙың урожайлылығын икеләтә арттырырға кәрәк. Был теләк көн һайын үҫте һәм Павлов райком секретарена килде.

— Уҡырға теләйем. Машиналар мине үҙҙәренә тарта.

— Аңлашыла, — тине секретар, — техниканы белергә кәрәк.

Бер аҙ уйлап торғандан һуң:

— Уҡыу тураһында ҡарарбыҙ.

Оҙаҡ та үтмәне, райкомдан Павловҡа:

— Һеҙҙе Ленинградҡа МТС директорҙары курсына уҡырға ебәрәбеҙ, хәйерле юл, — тип хәбәр иттеләр.

Көндәрҙе генә түгел, төндәрҙе лә машиналарҙы ихлас күңел менән өйрәнгән, ҡатмарлы хужалыҡ менән идара итеү өсөн күберәк белем алырға тырышып уҡыған Павлов Дәүләкән МТС-ына ҡайтты. Тәүлә МТС директорының урынбаҫары булып, ә 1940 йылдан директор булып эшләй башланы.

Йекмәтелгән яуаплылыҡтың мөһимлеген төрән аңлаған Федор Максимович бөтөнләйе менән эшкә бирелә. Бригадаларҙы комплектовать итә, кадрҙар әҙерләү, үҫтереү тураһында өҙлөкһеҙ хәстәрлек күрә. Баҫыуҙа ҡайнар эш көндәре бөткәс, бөтә бригадирҙар, тракторсылар МТС-ҡа йыйылалар, уҡыйҙар, белемдәрен арттыралар. Курстарҙа яңы механизаторҙар әҙерләнә. Бына шулай эшләү һөҙөмтәһендә хәҙер Дәүләкән МТС-ының Алехин, Желобецкий, Рогачев кеүек алдынғыларын бөтә республикала яҡшы беләләр.

Павлов дисциплиналы булыу яғынан бөтә коллективҡа өлгө булып тора һәм дисциплиналылыҡты ул һәр бер работниктан талап итә.

— Машина яҡшы тәрбиәне һәм хәстәрлекте талап итә, — тип өйрәтә ул. — Машинаны яратырға һәм һаҡларға кәрәк.

Инде бер нисә йыл Дәүләкән МТС-ы Башҡортостанда берексе-лекте алып килә. Әлбиттә, был көсөргәнешле хеҙмәт менән яуланып алынды. Бөтә машиналар һәм тағылма инвентарҙар көҙгө-ҡышҡы сезонда яҡшы сифатлы итеп ремонтланылалар, баҫыуға сыҡҡанға тиклем ҡат-ҡат тикшерелә. Бында бер генә тракторҙың да тәүге бураҙнала ултырып ҡалыу ваҡиғаһы булмай. Техниканы бөтә ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн бөтә саралар күрелә.

Федор Максимович социалистик ярыш ойоштороуға айырыуса ныҡ иғтибар итә. Дирекция, партия ойошмаһы менән берлектә, хеҙмәт етештереүсәнлегенең һыналған методын — социалистик ярышты ысын мәғәнәһендә йәйелдереү менән һәр ваҡыт серьез шөғөлләнә. Бына шуның өсөн дә МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алған Алехин бригадаһына башҡаларҙы ҡыуып үтеп китер өсөн бик ныҡ тырышып эшләргә тура килде.

1947 йылда МТС трактор эштәре планын 142 процентҡа үтәне. Һуңғы өс йыл эсендә МТС зарар күреүҙең нәмә икәнен дә белмәй. Тик үткән йылда ғына 150 мең һумлыҡ экономия яһалды. Һәр бер гектарҙы эшкәртеү Дәүләкән МТС-ында, башҡа машина-трактор станцияларына ҡарағанда, 2 һум 50 тингә арзанырағҡа төштө.

1947 йылда урожайлылыҡ буйынса ла уңыштар һөҡландырғыс. Планлаштырылған 9 центнер урынына, һәр гектарҙан уртаса 12,87 центнер бөртөклө ашлыҡ урожайы алынды. Айырым участкаларҙа урожай гектарҙан 25—28 центнерға барып етте.

Үткән йылдың яҙ һәм йәй көндәренең ҡыҙыу ваҡыттарын иҫкә төшөрөп Федор Максимович шуны һөйләй.

— Беҙҙә юғары урожай өсөн бөтә көсөн биреп көрәшмәгән бер генә тракторис та, бригадир ҙа булманы. Уларҙың бик күптәре сезон нормаһын 200 процентҡа һәм унан да күберәккә арттырып үтәнеләр.

Шартлы һәр бер тракторға 869 гектар — ул көрәштең көсөргәнешлелеген асыҡ күрһәтә.

Павлов үҙе тураһында һөйләргә ятмай. Ә бит МТС хеҙмәтләндергән зонала һәр бер колхозда, һәр бер өйҙә Павловтың йыл әйләнәһенә тиерлек баҫыуҙа, колхозсылар, механизаторҙар араһында булыуын, кәңәш итеүен, юғары урожай өсөн көрәште ойоштороуын һәр кем белә. Әгәр ҙә МТС-ҡа килеүсе кем дә булһа, директорҙың кабинетен һораһа, бында ҡыҫҡа ғына итеп:

— Баҫыуҙа,—тип яуап бирәләр.

1947 йылда СССР Ауыл хужалығы Министерствоһы приказы менән Дәүләкән МТС-ы күргәҙмә-терәк МТС-ҡа әйләндерелде. Был — Дәүләкән МТС-ы башҡаларға өйрәтә алырлыҡ «университет» булырға тейеш, тигән һүҙ. Советтар Союзында ундай МТС-тар ни бары 26. Дәүләкән машина-трактор станцияһы бик яҡын йылдар эсендә беҙҙең республикабыҙ өсөн генә түгел, күрше өлкәләр өсөн дә ысынлап та күргәҙмә-терәк МТС-ы булып хеҙмәт итергә бурыслы. Был бик яуаплы эш.

— Ул бурысты уңышлы хәл итербеҙ, — ти Павлов. — Бөтәһен дә, кешеләр беҙгә килгәндә, тәжрибә алып китерлек итеп ҡуйырбыҙ.

МТС-ты күргәҙмә-терәк хужалыҡ итеү өсөн хәҙер күп кенә нәмәләр эшләнде. Тракторҙар ремонты срогынан алда, яҡшы сифатлы итеп үткәрелде. Яғыулыҡ ташылып ҡуйылған. Эштә оперативлелек булдырыу маҡсатында һәр бер трактор бригадаһы «Урожай» тип аталған радиостанциялар менән тәьмин ителгән. Ике бригада — Социалистик Хеҙмәт Геройы Алехин һәм Желобецкий иптәштәр бригадаһы тәжрибә рәүешендә хозрасчетҡа күсерелгән. Һәм башҡа бик күп саралар үткәрелә.

— Шартлы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртербеҙ тип уйлайбыҙ, — ти МТС директоры иптәш Павлов.

Шатлыҡлы хәбәрҙе — Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы хәбәрҙе — ул тимер юл станцияһының йөк бушатыу площадкаһында ишетте. МТС-ҡа 7 яңы «НАТИ» тракторы килгәйне. уларҙы бушатыу менән иптәш Павлов үҙе етәкселек итте. Шатлыҡлы хәбәрҙе әйтеп, уны тәбрикләгәс, Социалистик Хеҙмәт Геройы Федор Максимович:

— Был ҙур хөрмәт тағы ла яҡшыраҡ эшләргә саҡыра. Хөкүмәттең юғары наградаһына лайыҡ тоши яуап бирербеҙ, — тине һәм беренсе яңы тракторға ултырып площадканан төштө. Уның артынан башҡа машиналар ҙа ҡуҙғалдылар, улар юлға сыҡтылар, алға, яңы хеҙмәт батырлыҡтары яулап алыу өсөн алға киттеләр.

И. Бычков.

Йәштәрҙең талабы

Комсомолец-йәштәр активе йыйылышы

Ошо көндәрҙә Өфө ҡала комсомолец-йәштәр активе «ВКП(б) Үҙәк Комитетының В. Мураделиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһы тураһындағы ҡарары» тигән темаға ВКП(б) Өлкә Комитетенең агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире урынбаҫары иптәш Багаевтең докладын тыңланы.

Доклад буйынса сығыш яһаусылар йәш быуынды идея-политик яҡтан тәрбиәләү мәсьәләләренең мөһим моменттарына туҡталып, ҡалалағы культура учреждениелары, ВЛКСМ-дың ҡала һәм район комитеттары тарафынан йәштәрҙең музыкаль культураһын арттырыуға, уларҙың үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндерерлек тейешле саралар күрелмәүе тураһында һөйләнеләр.

— Тимер юл техникумының художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәге күптән инде тамашасылар алдында авторитет ҡаҙанды, — тине техникумдың комсомол ойошмаһы секретаре иптәш Турдакин.— Ләкин был түңәрәккә республикан халыҡ ижады йорто һәм ҡала театрҙары тарафынан бер төрлө лә ярҙам күрһәтелгәне юҡ, ә ВЛКСМ райкомы был турала уйлап та ҡарамай.

Художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәктәренә ҡарата республикан халыҡ ижады йортоноң иғтибарһыҙ мөнәсәбәттә булыуы тураһында ВЛКСМ-дың Жданов район комитетенең ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге мөдире иптәш Соловьева һәм башҡа күп иптәштәр туҡталып үттеләр.

— ВЛКСМ-дың Жданов райкомы,— ти иптәш Соловьева,—комсомолдың тәүге ойошмалары секретарҙары менән бергә ВКП(б) Үҙәк Комитетенең музыка тураһындағы ҡарарын өйрәнеү өсөн халыҡ ижады йортонан докладсы һоратты. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, халыҡ ижады йорто тарафынан ебәрелгән докладсы иптәш Павлужин бөтөнләй әҙерләнмәйенсә килде һәм элементар һорауҙарға ла яуап бирә алманы, был факт шундай мөһим эшкә яуапһыҙ ҡарауҙы үҙен-үҙе күрһәтеп тора.

Сығыш яһаусылар, йәштәрҙең музыкаль культураһын арттырыуҙа Башгосфилармонияның дөрөҫ юл менән бармағанлығын ҡаты тәнҡит аҫтына алдылар.

— Беҙҙең йәштәр мазурка һәм рус халҡының башҡа шундай бейеүҙәрен бөтөнләй белмәйҙәр, ә блюз, линда кеүек кәкбайыш Европа танцылары тейкөгә тейеп бөттө инде һәм Башгосфилармония үҙенең шул тар танца майҙанынан башҡаны күрмәй, — тине иптәш Фокин. — Мазуркалар, краковяктар, халыҡ бейеүҙәре ҡайҙа? Хәҙерге көнбайыш танцыларына ҡарағанда улар популярыраҡ булырға тейештәр.

ВЛКСМ-дың ҡала комитетенең пропаганда буйынса секретаре иптәш Скобичкин завод йәштәре араһында матурлыҡ тойғоһо тәрбиәләү мәсьәләһе бик насар ҡуйылғанлығын, завод комсомол ойошмаларының быға әле иғтибар итмәгәнлектәрен, хатта, шул уҡ танцыларҙы төнгө сәғәт өскә тиклем (судноларҙы ремонтлау заводы) ойоштороуға барып еткәнлектәре тураһында һәм башҡорт композиторҙарының йәштәр өсөн марштар һәм популяр йырҙар яҙмағанлыҡтарын әйтеп китте.

ВЛКСМ-дың Өлкә Комитете секретаре иптәш Саяпов үҙенең сығышында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең музыка тураһындағы ҡарарының әһәмиәтен, йәштәрҙе тәрбиәләүҙә алда торған бурыстарҙы, һәм уларҙы тормошҡа ашырыуҙың конкрет юлдарын билдәләп үтте.

Ҡаты тәнҡит аҫтына алынған республикан халыҡ ижады йорто, Башгосфилармония кеүек культура учреждениелары вәкилдәре һәм башҡорт совет композиторҙары ни өсөндөр йыйылышта ҡатнашмағандар.

ЯҘ—МАЛДАРҘЫ ТӘРБИӘЛӘҮҘӘ ИҢ ЯУАПЛЫ ОСОР

БЕР ГЕНӘ БАШ МАЛДЫҢ ДА ӘРӘМ БУЛЫУЫНА ЮЛ ҠУЙМАҪҠА!

Совхоз работниктәре йөкләмәләрен үтәү өсөн көрәшәләр

Бәләбәй районы Максим Горький исемендәге малсылыҡ совхозы работниктәре малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукт биреүсәнлеген күтәреү буйынса социалистик ярышта үҙ йөкләмәләрен уңышлы үтәйҙәр.

Совхоздың малсылыҡ алдынғыларынан береһе — Марфа Леонтьевна Надточий. Ул 10 йыл һыйыр һауыусы булып эшләй. 1947 йылда Марфа Леонтьевна план буйынса 211 центнер урынына, 233 центнер һөт һауып алды. Ул быйыл быҙауҙар тәрбиәләй һәм был эштә лә хеҙмәт өлгөһө күрһәтә. Бишенсе йыл һыйыр һауған Камал Ямалиева ла планды арттырып үтәүсе. Ул 1947 йылда пландан тыш 22 центнер һөт һауып алды. Шулай уҡ 53 йәшлек Варвара Ефимовна Дорошенко ла йәштәрҙән ҡалышмай.

Совхозда сусҡасылыҡты үҫтереүгә лә ҙур әһәмиәт бирелә. Сусҡалар ҡараусы В. Е. Дурнаева сусҡаларҙың тәүге тапҡыр балалауы осоронда ғына 141 сусҡа балаһы алды. Н. Сафиуллин.



Карл Маркс исемендәге колхозда (Баймаҡ районы) һыйыр һауыусы К. Мырҙабулатова 1947 йылда үҙенә беркетелгән 16 һыйырҙың һәр береһенән 1170-шәр литр һөт һауып алды һәм 16 быҙау алып тәрбиәләне.

Һүрәттә: Иптәш Мырҙабулатова фермала үҙе тәрбиәләгән быҙауҙар янында. В. Жданов фотоһы.

Һыйыр һауыусы Латипова

Сәфәрбикә Латипова Ғафури районының «Йондоҙ» колхозында 1945 йылдан бирле һыйыр һауыусы булып эшләй. 1947 йылда иптәш Латипова үҙенә беркетелгән 10 һыйырҙан 10 быҙау алып, уларҙы хужаларса тәрбиәләп үҫтерҙе. Уға өҫтәмә түләү тәртибендә бер баш һарыҡ, 265 литр һөт бирелде.

— Быйыл мин тағы ла яҡшыраҡ уңыштарға өлгәшәсәкмен, — ти иптәш Латипова.

Ғәжәпләнерлек урын юҡ. Ул малдарҙы тәрбиәләүҙә һәм үҫтереүҙә зоотехник фән нигеҙендә эш итә, һыйырҙарҙы ҡыҫыр ҡалдырмау сараһын күрә. Уның ғинуар һәм февраль айҙарында быҙаулаған биш баш һыйыры тороҡторолған да инде. Улар ноябрь һәм декабрь айҙарында икенсе тапҡыр быҙаулаясаҡтар.

Иптәш Латипова быуаҙ һыйырҙарҙы тәрбиәләүгә айырыуса ныҡ иғтибар итә. Уларҙы быҙаулауҙан 10 көн элек айырым торлаҡҡа күсерә. Шулай уҡ быҙаулағас та, һыйырҙар 10 көнһөҙ дөйөм торлаҡҡа сығарылмайҙар. Шулай итеп, ул быҙауҙың һәм һыйырҙың тиҙ һауығыуына, үҫеүенә ярҙам итә, һыйырҙың күп һөт биреүе өсөн тәүге көндәрҙән үк шарттар тыуҙыра.

Сәфәрбикә Латипованың намыҫлы хеҙмәте юғары баһалана. Уның күкрәген «Батыр хеҙмәт өсөн» миҙале биҙәй. Ул БАССР Верховный Советы Президиумы грамотаһы менән наградланды. Иптәш Латипова район Советы депутаты вазифаһын да уңышлы үтәй. Маҡтаулы һыйыр һауыусының авторитеты колхозда көндән-көн үҫә. Йәғфәр Ғәлиев.

Һыйырҙарҙың һөт биреүсәнлеген арттырырға

Ауыл хужалығының мөһим тармағы булған малсылыҡ алдына ҙур талаптар ҡуйыла. ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары колхоз фермаларында һәр бер һыйырҙан һөт һауып алыуҙы, 1948 йыл аҙағына 1947 йылдағыға ҡарағанда, уртаса 15 процентҡа арттырыу бурысын ҡуйҙы.

Республикабыҙҙың күп кенә колхоздары был тарихи ҡарарҙы үтәү өсөн большевиктарса көрәшеп, малдарҙың продукт биреүсәнлеген арттырыуҙа һуғышҡа тиклем булған кимәлде байтаҡ уҙып киттеләр. Стәрлетамаҡ районының Шевченко исемендәге, Иглин районының «Брывайс Дарбс» колхоздарында уҙған йыл һәр бер һыйырҙан уртаса 2000 литрҙан артыҡ һөт һауып алдылар. Был, 1940 йылға сағыштырғанда, 1000 литрға артыҡ тигән һүҙ. Архангель районының Максим Горький исемендәге һәм «Путь к социализму» колхоздарында һәр бер һауын һыйырҙан 1700—1800-әр литр һөт һауып алынды.

Максим Горький исемендәге колхоздың алдынғы һыйыр һауыусыһы Анна Дуч, Иглин районының «Путь Ленина» колхозының һыйыр һауыусыһы Анна Засим иптәштәр үҙҙәренә беркетелгән һыйырҙарҙан 2500 литрҙан артыҡ һөт һауып алыуға өлгәштеләр. Был фактылар һәр бер фермала һыйырҙарҙы яҡшы ашатыуҙа, һөт һауыуҙа һәм тәрбиәләүҙә һәр бер һыйырҙан 50 процентҡа һөт уның да күберәк арттырырға тулы мөмкинлектәр булыуы тураһында һөйләйҙәр.

Үкенескә ҡаршы, алдынғыларҙың тәжрибәләре бөтә урындарҙа ла ҡулланылмай. Һыйырҙарға аҙыҡты төрләндереп, әҙерләп биреү, күберәк силос һәм тамыр аҙыҡ ашатыу, һыу эсереүҙе торлаҡтарҙа ойоштороу, һыйырҙарҙың елендәренә массаж яһау бөтә урындарҙа ла ойошторолмаған әле. Күйөргәҙе районындағы «Пламя» колхозында симменталь тоҡомло һыйырҙарҙан торған ҙур ферма бар. Фермала һыйырҙарға ғинуар айынан бирле бесән ашатмайҙар, һаламды ла яҡшылап әҙерләп бирмәйҙәр. Мал торлаҡтары былсыраҡ. Һыйырҙарға һалҡын һыу эсерәләр. Шуның һөҙөмтәһендә бында һыйырҙарҙың һөт биреүсәнлеге тәүлегенә 10—12 литрҙан 2—2,5 литрға ҡалған.

Һыйырҙарҙың һөт биреүсәнлеген арттырыу — мөһим бурыстарҙың береһе. Был бурысты хәл итеү өсөн беренсе нәүбәттә малдарҙы ашатыуҙы һәм тәрбиәләүҙе яҡшыртырға кәрәк. Һыйырҙарға аҙыҡ төрләндереп, әҙерләнеп, тураҡлап һәм парландырып, тоҙло һыу һибеп (һәр бер һыйырға 50—60 грамм иҫәбенән) бирелергә һәм шул уҡ ваҡытта силос та ашатылырға тейеш. Аҙыҡты норма буйынса, билдәләнгән сәғәттә ашатыу, йылы, таҙа һыу эсереү һөт биреүҙе арттырыуҙа төп шарт булып тора. Мал торлаҡтары һәр ваҡытта таҙа, ҡоро һәм йылытылған булырға тейеш. Һыйырҙарҙы тәүлегенә өс тапҡыр, ә күп һөт биреүселәрен дүрт тапҡыр һауырға, елендәренә массаж яһарға кәрәк. Алдынғы һыйыр һауыусылар һөттө тулыһынса һауып алалар һәм уларҙың тәжрибәләрендә яҡшы беләләр. Уларҙың тәжрибәләрен бөтә урында ҡулланырға кәрәк.

Ф. Мальков,
БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының баш зоотехнигы.

Суд залынан

Бандиттарға тейешле яза бирелде

1948 йылдың 3 апрелендә, Башҡорт АССР-ы Верховный судының уголовный коллегияһының, иптәш Әмирханов председателлегендә Сабитов, Глебовтар шайкаһын хөкөм итеү процесы тамамланды.

Был бандиттар шайкаһы, 1947 йылдың кеҙендә, Сабитов, Глебовтар тарафынан М. Вәлиев, М. Сибәғәтуллиндарҙан ойошторолоп, Ш. Аҡбашев, Г. Сибәғәтуллин, Г. Ракаевтар ярҙамында колхоздар, кооператив ойошмаларының складтарын ватыу, айырым кешеләрҙең малдарын талау менән шөғөлләнә башлай. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ҡоралды бандиттар асҡыс яратып һәм башҡа техник средстволарҙы ҡулланып Пушкин исемендәге колхоздың продуктылар складын, күн заводының тауар складын, кооператив ойошмаларының 29-сы, 48-се номерле киоскаларын таларға өлгөрәләр.

1947 йылдың 24 декабрендә бандиттар бесән һатырға килгән колхозсыларҙың кооператив слободаһында төшкән квартираһынан бер атын урлап, Аҡбашевтең йортона алып килеп, унан һуйҙыралар. Колхозсылар был турала милицияға барып әйтәләр. Милиция органы үҙенең эшлекле хеҙмәткәре, хөкүмәт тарафынан ике тапҡыр орден һәм бер медаль менән наградланған, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан күп тапҡырҙар бүләкләнгән тәжрибәле работнигы иптәш Мостафинде юғалған атты эҙләргә ебәрә.

Мостафин бер милиция работнигы ярҙамға алып, ат юғалған ергә китә, һәм тәжрибәле оперативник Мостафин, Аҡбашевтең һарайынан һуйылған аттың итен, тиреһен һәм башҡа ағзаларын таба. Был ваҡытта Глебов, Вәлиев, Сибәғәтуллиндар Аҡбашевтең йортонда ултырған булалар. Мостафин йортҡа барып ингәс Глебов — бандиттарҙың етәксеһе, кеҫәһенән пистолетын сығарып Мостафинде атып үлтерә.

Глебов был ваҡиғанан һуң уҡ ҡаса һәм үҙенең торған еренә, атаҡаларының йортона ҡайтмай, уның һөйәркәһе булып торған З. Тюфякова менән бергә торған А. Аничкова йортона барып йәшенә. Уларҙа Глебовтың эштәрен белә, А. Никифорова ла белә. Глебов байтаҡ ваҡыттар уларҙың йортонда йәшерен торған.

Верховный судтың уголовный коллегияһы был бандиттарҙы (атаманды ла) М. Сабитовты башҡаһына, П. Глебовты, М. Вәлиевте, М. Сибәғәтуллинде һәр береһен 25-әр йылға төрмәлә ултыртырға һәм ултырыу срогын тултырғас һуң 5 йылға гражданлыҡ хоҡуҡтарынан мәхрүм итергә, Ш. Аҡбашевҡа 10 йыл төрмә һәм 5 йыл гражданлыҡ хоҡуҡынан мәхрүм итергә, Г. Сибәғәтуллинға, Г. Ракаевҡа һәр береһенә 8-әр йыл төрмә һәм 5 йыл гражданлыҡ хоҡуҡынан мәхрүм итергә, З. Тюфяковаға, А. Аничковаға һәр береһенә 5-әр йыл төрмә һәм 3-әр йылға гражданлыҡ хоҡуҡынан мәхрүм итергә, А. Никифороваға бер йыл мәжбүри эш бирергә тигән приговор сығарҙы.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Монархистик фашистәрҙең нәүбәттәге һөжүменең уңышһыҙлыҡҡа осрауы

НЬЮ-ЙОРК, 2 апрель. (ТАСС). Авторитетле сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәргә һылтанып, Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәреһе Салоникиҙән, Кроссена тауҙарында ҡамалған тип иҫәпләнгән Маркос ғәскәрҙәре составынан, әгәр ҙә бер меҙ түгел икән, кәм тигәндә ес йөҙ кеше ҡамауҙан сыҡты, тип хәбәр итә. Әгәр ҙә белдереүҙәр дөрөҫ икән, ул саҡта киң рәүештә афишаланған «тәүге» һөжүм уңышһыҙлыҡҡа осраны. Маркостың Калон һәм Кастрон йүнәлеше буйынса көньяҡ-көнсығышҡа табан сигенеүсе көстәре, сағыштырмаса ҡурҡынысһыҙ урынға барып еткәнгә тиклем, Греция армияһының бары тик ике ротаһы менән бәрелешеүе ихтимал, тип хәбәр итәләр.

Американың Грециялағы хәрби миссияһы етәксеһе генерал Ван Флит Афинылағы пресс-конференцияла, монархистик-фашистик ғәскәрҙәр Кроссена тауҙарында «ҡапҡынды ҡапҡан» һалдылар, тип әйткән һәм һөҙөмтәләргә «һоҡланғыслығын» белдергән.

Ван Флит бынан тыш, хәбәрселәргә, 1 апрелдә операциялар өсөн тәнән күҙәтеү алып барыу өсөн Салоникигә самолетта осоп китеүгә йыйынғанлығы тураһында белдергән. Уны Греция армияһының штаб начальнигы Ядзис оҙатып барасаҡ.

Грецияның Кроссена тауҙарын тороусы ғәскәрҙәренә Американың алты офицере бирелгән.

Матбуғат һәм информация ирклеге мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара конференцияла

ЖЕНЕВА, 3 апрель. (ТАСС). Аргентина делегацияһы ошо көндәрҙә матбуғат һәм информация ирклеге мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара конференция председателенә хат менән мөрәжәғәт итте. Был хатта ул Испанияның Франко хөкүмәтенә конференцияға күҙәтеүсе сифатында үҙенең вәкилен ебәрергә тәкдим итте.

Был мәсьәлә кисә генеральный комитетта тикшерелде. Аргентина делегаты үҙенең тәкдимен конференцияның «универсаллегенә» ынтылыш менән нигеҙләне. АҠШ һәм Англия вәкилдәре председателдең, Франко Испанияһын саҡырыу хәҙер урынлы булмаҫ ине, тигән фекере менән килештеләр.

Совет делегацияһы етәксеһе Богомолов, Франко Испанияһын бында үҙенең күҙәтеүсеһен ебәрергә тәкдим яһау Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Испания мәсьәләһе буйынса билдәле ҡарарҙарын тупаҫ рәүештә боҙоу булып тороп ине, тип айырыуса билдәләне. Ул, Совет делегацияһы Аргентина тәкдименә ҡырҡа ҡаршы килә, тип белдерҙе.

Тауышҡа ҡуйыу һөҙөмтәһендә Аргентина делегацияһының тәкдиме бер тауыштан кире ҡағылды.

Ҡытай ҡоралды отряденең МНР территорияһына инеүе

УЛАН-БАТОР, 3 апрель. (ТАСС). Кисә «Ун Эн» газетаһы Монголия Халыҡ Республикаһы сит ил эштәре министерствоһының түбәндәге хәбәрен баҫып сығарҙы.

1948 йылдың 29 февралендә Ҡытайҙың 70-тән артыҡ һыбайлы ҡоралды отряды Монголия Халыҡ Республикаһының Ихэ Хабтаг Нуру тауы районындағы сик буйы һағына ябынан һөжүм итте һәм, МНР территорияһына 80 километрға эскә инеп, Коблосск аймағы халыҡтарын таланы. Монголияның сик буйы һағы тарафынан күрелгән саралар һөҙөмтәһендә Ҡытай отряды МНР территорияһынан ҡыуып сығарылды. Ошо яңы ҡоралды һөжүм ваҡытында Ҡытай һалдаттары мал аҫыраусыларҙың береһен үлтерҙеләр һәм бер нисәһен яраланылар һәм мал аҫыраусыларҙың 26 дөйәһен, 50 һарығын алып киттеләр.

Юғарыла яҙылғандар айҡанлы Монголия Халыҡ Республикаһы хөкүмәте Ҡытай хөкүмәтенә протест белдерҙе һәм Ҡытай ҡоралды отрядтарының ошондай закондыһыҙ хәрәкәттәрен киләсәктә булдырмау өсөн саралар күреүҙе һәм уға юл ҡуймауҙы талап итте. МНР хөкүмәте Ҡытай хөкүмәтенән Ҡытай ҡоралды отрядтарының туҡтауһыҙ рәүештә һөжүм итеүҙәре арҡаһында Монголия яғына яһалған зыянды тулыһынса түләтеүҙе талап итеү хоҡуҡын үҙендә ҡалдырҙы.

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 3 апрель. (ТАСС). Азат Греция радио станцияһы «Элефтери Эллада» агентствоһының хәбәрен тапшырҙы. Был хәбәрҙә 17 марттан 23 мартҡа тиклем ваҡыт эсендә демократик армия частәре Маттинне һәм Калаврита секторында 11 ауылды алдылар һәм бик күп һанда ҡорал һәм аҙыҡ-түлек ҡулға төшерҙеләр, тип әйтелә.

26 мартта демократик армия частәре Флорин ҡалаһы янындағы ҡарауылдарға һөжүм иткәндәр. Һуғыш ваҡытында демократик армия боецтары ҡалаға ингәндәр һәм унда ваҡытлы демократик хөкүмәттең өндәмәһе яҙылған мөһөрләгән листовкалар таштағандар.

Эгидала, Клементица һәм Кафиндә монархистик-фашистик таяныс пункттарға ҡаршы демократик армия күп кенә уңышлы операциялар яһаған. Бик күп һанда ҡоралдар һәм һуғыш припастары алынған.

„Көнсығыш блокты" төҙөү тураһында „Телеграф" газетаһы

БЕЙРУТ, 3 апрель. (ТАСС). «Телеграф» газетаһының яҙыуына ҡарағанда, Грецияның Ҡаирҙағы посланнигы Грецияны, Төркиәне һәм ғәрәп илдәре лигаһына инеүсе илдәрҙе индереүсе көнсығыш блогы төҙөү тураһында Грецияның тәкдимен бөтә ғәрәп илдәре вәкилдәренә белдергән.

Тольяттиҙең „Унита" газетаһына яһаған белдереүе

РИМ, 5 апрель. (ТАСС). Көньяҡ Италияның төрлө өлкәләренә һайлау алдынан йөрөп ҡайтҡас, коммунистәр партияһының генеральный секретаре Пальмиро Тольятти «Унита» газетаһына түбәндәге белдереүҙе яһаны: «Көньяҡ Италияның ҡайһы бер райондарында минең аҙ ғына ваҡыт булыуым миңә тәрән тәьҫир ҡалдырҙы. Һүҙ һайлау алды характерындағы ҡайһы бер факторҙар тураһында ғына бармай. Беҙ хәҙерге ваҡытта хакимлек итеүсе реакцион иҫке синыфтарға буйһоноу позицияларынан баш тартыусы һәм ҙур энтузиазм менән алдынғы демократик партиялар тирәһенә ойошоуусы тотош өлкәләрҙең хеҙмәтсән массалары араһында ҙур һәм ҡырҡа алға китеш алдында торабыҙ. Ҡабатлайым, һүҙ һайлау алды факторы тураһында түгел, ә беҙҙең илебеҙ тарихында ысын политик алға китеш тураһында бара. Әгәр ҙә беҙ Көньяҡ Италиялағы алдынғы демократияның яңы позицияларын ныҡыта алһаҡ, ул саҡта, Италия киләсәктәге прогресс һәм социаль ғәҙеллек өсөн тулыһынса нығып алынды, тип иҫәпләргә мөмкин буласаҡ».

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

Йәш малдарҙы тулыһынса һаҡларға

Һуғыштан һуңғы сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында республикабыҙҙың колхоздарына малсылыҡ өлкәһендә ҙур һәм яуаплы бурыстарҙы хәл итергә тура киләсәк. Малсылыҡты үҫтереү планы буйынса 1948 йылда колхоз малдарының һаны аттар буйынса 15, мөгөҙлө эре малдар буйынса 23,2, сусҡалар буйынса 106 һәм һарыҡтар буйынса 32,1 процентҡа артырға тейеш.

Был яуаплы программаны үтәү бөтә малсылыҡ работниктәренән, партия һәм совет ойошмаларынан көсөрҡәнешле хеҙмәт һәм тырышлыҡ талап итә. Бындай мөһим мәсьәләлә йәш малдарҙы мөмкин тиклем күберәк алыуға өлгәшеү һәм уларҙы юғалтмайынса һаҡлау бик ҙур әһәмиәткә эйә. Сөнки йәш малдар—дөйөм малсылыҡ үҫешенең төп сығанағы. Шуға ҡарамаҫтан, күп кенә райондарҙа һәм колхоздарҙа йәш малдарҙы алыу һәм һаҡлау эшенә кәрәкле иғтибар бирелмәй. Йәш малдарҙың бик аҙ алыныуы менән бергә, уларҙың үлеүенә лә юл ҡуйыла. Мәҫәлән, Оло-Тиләк районында үткән йылда быҙауҙарҙың 22,9, бәрәстәрҙең 39,4 проценте, ә Күйөргәҙе районында быҙауҙарҙың 20,1 проценте үлде. Шулай уҡ Йылайыр, Аҫҡын, Ҡырмыҫҡалы, Краснокама райондарында ла малдарҙы юғалтыу ҙур. Шуға күрә лә был райондар малсылыҡты үҫтереүҙә государство планын үтәй алмайылар.

Йәш малдарҙың кәмеүен ҡайһы бер колхоз етәкселәре, хатта малсылыҡ специалистәре лә, эпизоотик ауырыуҙар кеүек объектив сәбәптәр менән генә аңлатырға тырышалар. Ләкин былар бөтөнләй нигеҙһеҙ һылтаныуҙар. Уның ысын сәбәптәре башҡаса. Йәш малдарҙы насар тәрбиәләүҙә, уларға кәрәкле шарттарҙың тыуҙырылмауында, фермаларҙа хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолмауында.

Мишкә районының Карл Маркс исемендәге колхозында үткән йыл 14 һыйырҙан тик 8-енән генә быҙау алынып, уларҙың да 6-һы үлгән. Шул уҡ райондың «Социализм» колхозында алынған 27 һарыҡ бәрәсенең 21-е үлгән. Быны сәбәбе асыҡ. Был колхоздарҙа йәш малдарҙы алыуға яҡшы әҙерләнмәгәндәр. Уларҙы былсыраҡ, яраҡлаштырылмаған торлаҡтарға урынлаштырғандар, тәрбиә ойошторолмаған.

Йәш малдарҙы яҡшы тәрбиәләгән колхоздар ҙа, билдәле, аҙ түгел. Уларҙа мал үлеү ваҡиғаһы бөтөнләй юҡ. Үткән йылда Ҡыйғы районы колхоздары һәр 100 баш һыйырҙан 91,3 быҙау, 100 баш һарыҡтан 101,5 бәрәс алдылар. Тимирязев исемендәге колхозда 73 һарыҡтан 125 бәрәс алып, тулыһы менән һаҡлап үҫтерелде. Нуриман районының «Ҡыҙыл йондоҙ», «Восток» һәм Бәһәу исемендәге колхоздарында 1948 йылдың ике айы эсендә алынған бөтә йәш малдар тулыһы менән һаҡландылар.

Республикабыҙ колхоздарында малсылыҡ алдынғыларының күп һанлы армияһы үҫеп сыҡты. Уларҙың бай тәжрибәләре йәш малды тулыһынса һаҡларға, уны тәрбиәләп үҫтереүгә һәр колхозда һәм һәр фермала тулы мөмкинлектәр барлығын асыҡ күрһәтәләр. Архангель районы «Путь к социализму» колхозының быҙау ҡараусыһы иптәш Соснина 1947 йылда 64 быҙау үҫтерҙе. Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының һарыҡсылыҡ фермаһы мөдире иптәш Виниченко 300 һарыҡтан 435 бәрәс алып, бөтәһен дә һаҡлай алды. Дыуан районы «Урал» колхозының сусҡа ҡараусыһы Анна Накоскина 12 йыл эсендә колхоз өсөн 1500 баш сусҡа үҫтерҙе. 1947 йылда ул 7 сусҡанан 140 сусҡа балаһы алды. Әбйәлил районының Буденный исемендәге колхоздың ат ҡараусыһы иптәш Яуымбаев 46 бейәнән 46 ҡолон алып үҫтерҙе. Бындай миҫалдар башҡа райондарҙа ла күп. Тик алдынғыларҙың эш методтарын пропагандалау ғына етешмәй.

Хәҙер колхоз тауар фермалары өсөн хәл иткес осор—һыйырҙарҙың массовый рәүештә быҙаулау, һарыҡтарҙың бәрәсләү ваҡыты. Был көндәрҙә малсылыҡ эшендә бөтә йыллыҡ уңышҡа нигеҙ һалына. Шуға күрә был осорҙо ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрергә, йәш малдар алыуҙы яҡшы ойошторорға һәм уларҙы тулыһынса һаҡлауҙы тәьмин итергә кәрәк. Һәр бер фермала быуаҙ малдарға яҡшы тәрбиә һәм зооветеринария талап иткәнсә урындар әҙерләнергә тейеш. Һәр бер колхоз фермаһында йәш мал өсөн йылы, яҡты һәм дезинфекцияланған урын булһын. Уларҙы иң яҡшы аҙыҡтар, шулай уҡ тоҙ, аҡбур кеүек минераль аҙыҡтар менән тәьмин итергә кәрәк. Йәш малға ваҡытында ашатыу һәм һыу эсереү бик мөһим.

Был эштәрҙең уңышлы үтәлеүе малсылыҡ работниктәренең әҙерлегенә, эш тәжрибәләренә һәм тапшырылған эште яратып башҡарыуҙарына бәйләнгән. Шуға күрә йәш малдарҙы тәрбиәләү был эште һөйөүсе һәм тәжрибәле кешеләргә тапшырылырға тейеш.

Йәш малдарҙы алыу һәм юғалтыуһыҙ тәрбиәләү — малсылыҡ работниктәренең изге бурысы. Партия, совет ойошмалары, ауыл хужалығы специалистәре был бурысты уңышлы үтәп сығыу өсөн уларға даими рәүештә ярҙам итергә тейештәр.

И. Филатов,
БАССР Ауыл хужалығы Министренең урынбаҫары.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — «ТАЛАНТТАР ҺӘМ БАШ ЭЙЕҮСЕЛӘР». Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СОВЕТ БАШҠОРТОСТАНЫ».

«Салауатта» — «ГЕОРГИЙ СААКАДЗЕ» (беренсе серия).

Матросов исемендәге кинола — «КОНЕК-ГОРБУНОК».

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 01651. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советe һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советe органы.

29-сы йыл сыға
№ 71
1948 йыл
9
апрель
йома
хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә И. В. Сталиндә төшкө аш. (1-се бит).
Советтәр Союзы менән Финляндия араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Договорға ҡул ҡуйыу. (1-се бит).
Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Финляндия Республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Договор. (1-се бит).
В. М. Молотов телмәре. (1-се бит).
Пеккала әфәнде телмәре. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. **М. Садретдинов.** — Коммунистәр — социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүҙе ойоштороусылар, **Х. Ғәлимов.** — Коммунистәрҙе идея-политик тәрбиәләүгә иғтибарһыҙ ҡараш. (2-се бит).
Башҡорт АССР-ы Министерҙәр Советендә. (2-се бит).
СОЦИАЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙЫ. **Ғ. Әхмәтшин.** — Өлкән механик Николай Тарасенко. (3-сө бит).
Башҡортостан йәш нефтселәренең икенсе слеты (3-сө бит).
Н. Ғәлимов. — Ужымдарҙы аҙыҡландырыуға әҙерләнмәйҙәр. (3-сө бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Ужым сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙе яҡшы ойошторорға

Республикабыҙҙың сәсеү майҙанында арыш культураһы ҙур урын тота. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашыра барып, колхоздар, совхоздар үткән йыл арыш сәсеү планын арттырып үтәнеләр. Иртә сроктарҙа сәселгән был культура ҡышҡы осорға ныҡынып инде. Үткәрелгән тәжрибәләр ужымдарҙың яҡшы ҡышлауын күрһәтәләр. Ләкин был ыңғай күренештәргә ҡарап, хәҙер инде юғары урожай үҙенән-үҙе килер, тип уйлау бөтөнләй хата булыр ине.

Ужымдарға яҙ, бигерәк тә уның тәүге көндәрендә, хәстәрлекле тәрбиә талап ителә. Сәсеүлектәр яҡшы үҫеп, ныҡынып китһендәр өсөн, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырырға, тырматырға кәрәк. Был сараларҙы үҙ ваҡытында, совет агрономияһы талап иткәнсә үткәргәндә генә короллоҡ, әҫе елдәр ужымдар өсөн ҡурҡынысһыҙ булмаясаҡтар, юғары урожайға ышаныслы нигеҙ һалынасаҡ.

Ғилми тәжрибәләр, ауыл хужалығы алдынғыларының эштәре ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙың һәм тырматыуҙың күп өҫтәмә урожай биреүе тураһында һөйләйҙәр. Арыштан 30-ар центнер һәм унан да юғарыраҡ урожай алған Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғиниәт Насиров һәм башҡа иптәштәр был сараларҙы киң ҡулландылар. Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙың урожайҙы күтәреүгә ниндәй ҙур йоғонто яһауын Зианчура районы «Луч» колхозы миҫалында ла яҡшы күреп була. Бында гектарына 4-әр центнер көл һәм 2-шәр центнер ҡош тиҙәге менән аҙыҡландырылған участканың һәр гектарынан 9-ар центнер өҫтәмә урожай алынды. Бына икенсе миҫал. Салауат районының «Әй» колхозында яҙ аҙыҡландырылған һәм тырматылған арыш һәр бер гектарҙан 28,8 центнер урожай бирҙе. Ә был саралар үткәрелмәгән майҙандарҙың гектарынан 17-шәр генә центнер урожай алынды. Айырма 9,8 центнер! Былар бөтәһе лә аҙыҡландырыуҙы һәм тырматыуҙы киң ҡулланыу кәрәклеген күрһәтәләр.

Быйыл ужымдарҙы аҙыҡландырыу һәм тырматыу ҙур майҙандарҙа үткәреләсәк. СССР Министрҙар Советe ҡарары менән Башҡортостан колхоздарына 70 мең гектар ужымды өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм 500 мең гектарҙы яҙ тырматыу планы билдәләнде. Был сараларҙы дөрөҫ һәм тулы үткәргәндә бер нисә йөҙ мең бот өҫтәмә урожай алынасаҡ. Быға өлгәшеү өсөн ужымдарҙы тәрбиәләү буйынса бөтә колхоздарҙа, бригадаларҙа һәм звеноларҙа ашығыс саралар күреү талап ителә. Алдынғы колхоздар был өлкәлә күп кенә хәстәрлек күрҙеләр инде. Мәҫәлән, Яңауыл районының «Коммунар», Чкалов, Молотов исемендәге колхоздары, Дәүләкән районының «Ҡыҙыл Урал», «Бик-ҡарамалы», «Новый быт», Краснокам районының «Красный Нагай», Калинин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу планын үтәүгә генә түгел, планды байтаҡ арттырып үтәргә етерлек ашламалар әҙерләнеләр. Был сараны үткәреү өсөн тәжрибәле колхозсылар бүленде, уларға инструкция бирелде. Кәрәкле инвентарҙар ҙа әҙерләнеп ҡуйылды.

Үкенескә ҡаршы, бөтә урындарҙа ла ужымдарҙы тәрбиәләүгә әҙерлек эштәре былай тормай. Ашламалар бик аҡрын туплана. Көл һәм ҡош тиҙәге йыйнау планы республика буйынса 35—40 процентҡа ғына үтәлде. Абзан, Белокатай, Ғафури, Мишкә, Оло-Тиләк райондарында көл йыйнау менән бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр. Бишбүләк, Ҡандра, Покровка райондары колхоздарында ҡош тиҙәге йыйнау эше әле булһа ойошторолмаған.

Үткән йыл ҡайһы бер райондарҙа минераль ашламаларҙы ҡулланыуға әһәмиәт бирелмәне. Ҡиммәтле ашламалар складтарҙа ятып ҡалдылар. Был хата быйыл да күп кенә урындарҙа ҡабатлана. 22—28 тонна азотлы ашламалар алырға тейеш булған Архангель, Ҡырмыҫҡалы райондары ошо көнгә тиклем был тапҡырҙа бер генә нәмә лә эшләмәйҙәр.

Ужым сәсеүлектәрен тәрбиәләү — государство әһәмиәтендәге ҙур эш. Уға әҙерлектәге булған етешһеҙлектәрҙе һис кисекмәҫтән бөтөрөргә кәрәк.

Иң беренсе нәүбәттә ужымдарҙы аҙыҡландырыу һәм тырматыу планы һәр бер бригадаға, звеноға еткерелергә тейеш. Шунан сығып, планды тулыһынса үтәү һәм арттырып үтәү өсөн урындағы һәм минераль ашламаларҙы туплау эшен көсәйтергә, колхоздарҙа булған бай мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта был яуаплы эштәрҙе үткәреү өсөн тәжрибәле кешеләр бүленергә, уларға конкрет инструкциялар бирелергә тейеш.

Ужым культураларын тәрбиәләүҙә агрономдарҙың ролдәре айырыуса ҙур. Агроном сәсеүлектәрҙең торошон ваҡытында тикшерергә, уларҙың ниндәй тәрбиәгә мохтаж икәнлектәрен билдәләргә бурыслы. Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы бөтә урындарҙа ла бер төрлө ашламалар менән үткәреү һәм бер үк норма ҡулланыу мөмкин түгел. Бында тупраҡтың сифатын да, ужымдарҙың торошон да иҫкә алырға кәрәк. Был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә колхоздарға, әлбиттә, агроном ярҙамға килергә тейеш.

Ужым сәсеүлектәренә тәрбиә сараларын үткәрергә ваҡыт килеп етә. Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫ ваҡытта уҡ үткәрергә кәрәк. Хәҙер бөтә колхозсылар, ауыл хужалығы специалистәре был мөһим бурысты уңышлы хәл итеү өсөн әҙерлек эштәрен тамамларға һәм тәүге мөмкинлектәр тыуыу менән эшкә тотонорға тейештәр.

Партия, совет, комсомол ойошмалары ужымдарҙы яҡшы тәрбиәләүҙең урожайҙы күтәреүҙәге ролен бөтә колхозсыларға аңлатырға, өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу планының һәр бер колхоз буйынса үтәлеүен тәьмин итергә бурыслылар.

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә И. В. Сталиндә төшкө аш

СССР Министрҙар Советe Председателе И. В. Сталин Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә 7 апрелдә Кремлдә төшкө аш бирҙе.

Төшкө ашта Финляндия Премьер-Министре М. Пеккала әфәнде, Сит ил Эштәре Министрҙәре К. Энкель, Р. Свенто әфәнделәр, Эске эштәр Министре Ю. Лейно әфәнде, Сеймдең Вице-Председателе У. Кекконен әфәнде, Сейм депутаттары О. Пелтонен һәм И. Седерьельм әфәнделәр, Финляндияның СССР-ҙағы Посланнигы К. Сундстрем әфәнде, генералдар А. Хейнрикс һәм В. Ойнонен ҡатнаштылар.

Төшкө ашта Советтәр Союзы яғынан В. М. Молотов, А. А. Жданов, К. Е. Ворошилов, Л. П. Берия, Г. М. Маленков, А. И. Микоян, Л. М. Каганович, Н. А. Вознесенский, Н. А. Булганин, А. Я. Вышинский, В. А. Зорин, А. Д. Крутиков, авиация Маршалы К. А. Вершинин, Адмирал А. Г. Головко, Генерал-полковник Ф. Ф. Кузнецов, СССР-ҙың Финляндиялағы Посланнигы Г. М. Савоненков, СССР Сит ил Эштәре Министерствоһының яуаплы работниктәре А. Н. Абрамов, Ф. Ф. Молочков, Б. Ф. Подцероб ҡатнаштылар.

Төшкө аш дуҫтарса обстановкала үтте.

(ТАСС).

Дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет-Болгария Договорын ратификациялау

1948 йылдың 7 апрелендә СССР Верховный Советe Президиумы Совет Социалистик республикалар Союзы менән Болгария Халыҡ Республикаһы араһындағы дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында 1948 йылдың 18 мартында ҡул ҡуйылған Договорҙы ратификацияланы.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫ МЕНӘН ФИНЛЯНДИЯ АРАҺЫНДА ДУҪЛЫҠ, ХЕҘМӘТТӘШЛЕК ҺӘМ ҮҘ-АРА ЯРҘАМ ТУРАҺЫНДА ДОГОВОРҒА ҠУЛ ҠУЙЫУ

Һуңғы көндәрҙә Мәскәүҙә дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Договор төҙәү мәсьәләһе буйынса Совет-Финляндия һөйләшеүҙәре барҙы. Һөйләшеүҙәр СССР Министрҙар Советe Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов һәм Финляндияның премьер-министре М. Пеккала әфәнде араһында алып барылды.

Һөйләшеүҙәрҙә Советтәр Союзы яғынан СССР Сит ил Эштәре Министренең урынбаҫарҙары А. Я. Вышинский һәм В. А. Зорин, СССР-ҙың Финляндиялағы посланнигы Г. М. Савоненков һәм СССР Сит ил Эштәре Министерствоһының 5-се Европа бүлеге мөдире А. Н. Абрамов ҡатнаштылар. Һөйләшеүҙәрҙә Финляндия яғынан Хөкүмәт Делегацияһы члендәре — Сит ил Эштәре Министрҙәре К. Энкель һәм Р. Свенто әфәнделәр, Эске эштәр Министре Ю. Лейно әфәнде, Сеймдең Вице-Председателе У. Кекконен әфәнде һәм Сейм депутаттары О. Пелтонен һәм И. Седерьельм әфәнделәр ҡатнаштылар.

Дуҫлыҡ отмосфераһында үткән һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә, 6 апрелдә Кремлдә Советтәр Союзы һәм Финляндия Республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Договорға ҡул ҡуйылды.

СССР Верховный Советe Президиумы тапшырыуы буйынса Договорға СССР Министрҙар Советe Председателенең Урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов һәм Финляндия Республикаһы Президенте тапшырыуы буйынса Премьер-Министр Мауно Пеккала әфәнде ҡул ҡуйҙылар.

Договорға ҡул ҡуйғанда СССР Министрҙар Советe Председателе И. В. Сталин ҡатнашты.

Договорға ҡул ҡуйғанда Финляндия Республикаһы яғынан Сит ил Эштәре Министре К. Энкель әфәнде, Сит ил Эштәре Министре Р. Свенто әфәнде, Эске эштәр Министре Ю. Лейно әфәнде, Финляндия Сейменең Вице-Председателе У. Кекконен әфәнде, Сейм депутаттары О. Пелтонен һәм И. Седерьельм әфәнделәр, СССР-ҙағы посланник К. Сундстрем әфәнде, генералдар А. Хейнрикс һәм В. Ойнонен һәм башҡалар ҡатнаштылар.

Советтәр Союзы яғынан СССР Сит ил Эштәре Министренең урынбаҫарҙары А. Я. Вышинский һәм В. А. Зорин, СССР-ҙың Финляндиялағы посланнигы Г. М. Савоненков, СССР Сит ил Эштәре Министерствоһының 5-се Европа бүлеге мөдире А. Н. Абрамов, СССР Сит ил Эштәре Министерствоһының Протоколдар бүлеге мөдире Ф. Ф. Молочков, СССР Сит ил Эштәре Министерствоһының Договор-Хоҡуҡ Управлениеһе начальнигенең урынбаҫары М. А. Буев һәм башҡалар ҡатнаштылар.

Договорға ҡул ҡуйғанда В. М. Молотов һәм М. Пеккала әфәнде телмәрҙәр һөйләнеләр.

Түбәндә Договорҙың тексы килтерелә.

Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Финляндия Республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында

ДОГОВОР

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советe Президиумы һәм Финляндия Республикаһы Президенте,

СССР һәм Финляндия араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен артабан үҫтереү маҡсатында,

Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Финляндия Республикаһы араһында яҡшы күршелек мөнәсәбәттәрен һәм хеҙмәттәшлекте ныҡытыу ике ил халыҡтарының да йәшәү интерестәренә яуап биреүенә ышанған хәлдә,

Финляндияның бөйөк державалар араһындағы интерестар ҡаршылығынан ситтә ҡалырға ынтылыуын иҫәпкә алып һәм

Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының маҡсаттарына һәм принциптәренә ярашлы рәүештә, халыҡ-ара тыныслыҡты һәм имиңселекте яҡлау интерестарында ныҡлы хеҙмәттәшлеккә үҙҙәренең ынтылыуҙарын сағылдырып,

ошо маҡсаттарҙа был Договорҙы төҙәргә һәм үҙҙәренең уполномоченныйҙары сифатында түбәндәге кешеләрҙе билдәләргә ҡарар иттеләр:

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советe Президиумы — ССР Союзы Министрҙар Советe Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре Вячеслав Михайлович **Молотовты;**

Финляндия Республикаһы Президенте — Финляндия Республикаһының Премьер-Министре Мауно **Пеккаланы,**

улар тейешле формала һәм тулыһынса тәртиптә табылған үҙҙәренең полномочеләре менән алышҡандан һуң түбәндәгеләр тураһында килештеләр:

1-се статья

Әгәр Финляндия йәки Советтәр Союзы Финляндия территорияһы аша Германия йәки уның менән союздаш булған ниндәй ҙә булһа государство тарафынан хәрби агрессия объекты булып ҡалһалар, Финляндия, үҙенең бойондороҡһоҙ государство бурысына тоғро булып, агрессияны кире ҡағыу өсөн һуғышасаҡ. Бындай хәлдә, ошо Договор буйынса үҙенең йөкләмәләренә ярашлы рәүештә, кәрәк булһа Советтәр Союзының ярҙамында йәки уның менән бергә, ҡоро ерҙә, диңгеҙҙә һәм һауала үҙенең территорияһының тейелмәҫлеген яҡлауға Финляндия үҙ ҡарамағында булған бөтә көсөн йүнәлтәсәк.

Юғарыла күрһәтелгән шарттарҙа Советтәр Союзы Финляндияға кәрәкле ярҙамды күрһәтәсәк, был ярҙамды күрһәтеү тураһында Тарафтар бер-береһе менән һөйләшеп килешәсәктәр.

2-се статья

Договорлашыусы Юғары Тарафтар 1-се статьяла ҡаралған хәрби һөжүм ҡурҡынысын билдәләүҙә бер-береһе менән консультация яһап торасаҡтар.

3-сө статья

Договорлашыусы Юғары Тарафтар Берләшкән Милләттәр Ойошмаһының маҡсаттарына һәм принциптәренә ярашлы рәүештә, халыҡ-ара тыныслыҡты һәм имиңселекте яҡлауға йүнәлтелгән бөтә эштәрҙә үҙҙәренең ысын күңелдән ҡатнашырға ынтылыуҙарын белдерәләр.

4-се статья

Договорлашыусы Юғары Тарафтар, 1947 йылдың 10 февралендә Парижда ҡул ҡуйылған Тыныслыҡ Договорының 3-сө статьяһында ҡаралғанынса, Договорлашыусы икенсе Юғары Тарафҡа ҡаршы йүнәлтелгән ниндәй ҙә булһа Союз төҙөшмәҫкә йәки коалицияларҙа ҡатнашмаҫҡа алынған йөкләмәне дөрөҫләйҙәр.

5-се статья

Договорлашыусы Юғары Тарафтар Советтәр Союзы менән Финляндия араһында экономик һәм культура бәйләнештәрен артабан үҫтереү маҡсатында хеҙмәттәшлек һәм дуҫлыҡ рухында эшләргә ҡарар итеүҙәрен дөрөҫләйҙәр.

6-сы статья

Договорлашыусы Юғары Тарафтар үҙҙәренең государство суверенитеттәрен һәм бойондороҡһоҙлоҡтарын үҙ-ара хөрмәтләү, шулай уҡ икенсе государствоның эске эштәренә тығылмау принциптәре буйынса барырға йөкләмә алалар.

7-се статья

Был Договор Берләшкән Милләттәр Ойошмаһы принциптәренә ярашлы рәүештә тормошҡа ашырыласаҡ.

8-се статья

Был Договор ратификацияланырға тейеш һәм уның үҙ көсөнә ингән көндән алып, 10 йыл буйынса ғәмәлдә буласаҡ. Договор ратификацион грамоталарҙы алышҡандан һуң үҙ көсөнә инә. Ратификацион грамоталарҙы алышыу мөмкин тиклем ҡыҫҡа срокта Хельсинкиҙа үткәреләсәк.

Әгәр Договорлашыусы Юғары Тарафтарҙың береһе ошо күрһәтелгән 10 йыл срок бөткәнгә тиклем бер йыл элек Договорҙан баш тартмаһа, Договорлашыусы Юғары Тарафтарҙың береһе Договорҙың хәрәкәтен туҡтатырға теләүе тураһында ағымдағы биш йыл тамамланыр алдынан бер йыл элек яҙма рәүештә иҫкәртеү яһамаһа, ул артабанғы һәр бер биш йылға үҙ көсөндә ҡаласаҡ.

Ошоно раҫлап, Уполномоченныйҙар был Договорға ҡул ҡуйҙылар һәм уға үҙҙәренең печаттәрен баҫтылар.

Мәскәүҙә, 1948 йылдың 6 апрелендә, ике данала, һәр береһе рус һәм фин телендә төҙөлдө. Ике данаһы ла көсө бер.

СССР Верховный Советe Президиумының тапшырыуы буйынса
В. МОЛОТОВ.

Финляндия Республикаһы Президентенең тапшырыуы буйынса
Мауно ПЕККАЛА.

В. М. МОЛОТОВ телмәре

Премьер-Министр әфәнде, әфәнделәр!

Советтәр Союзы менән Финляндия араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында төҙөлгән һәм бөгөн ҡул ҡуйылған Договор Совет-Финляндия мөнәсәбәттәрен үҫтереүҙә мөһим этап булып тора. Был Договор Германия агрессияһының ҡабатланыуына ҡаршы йүнәлдерелгән һәм беҙҙең илдәребеҙ араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү интерестарена һәм Европала тыныслыҡты ныҡытыуға хеҙмәт итә.

Ошондай Договорҙы төҙәү элгәреп үткән эш икәнлеген танырға кәрәк. Совет Хөкүмәтенең башлығы И. В. Сталиндең Финляндия Президенте Паасикиви әфәнде исеменә яҙған билдәле хатында «тыныслыҡты һәм имиңселекте ныҡытыу маҡсаттарында беҙҙең илдәребеҙ араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тамырынан яҡшыртыу өсөн шарттар тыуҙырырға» тигән теләк белдерелгәйне.

Был уңай менән һуңғы көндәрҙә Договор төҙөшеү тураһында Совет-Финляндия араһында һөйләшеүҙәр алып барылды, шуның менән бергә Договорҙың нигеҙенә Финляндия хөкүмәте тарафынан тәҡдим ителгән проект һалынды. Совет-Финляндия һөйләшеүҙәре барышында шулай уҡ ике илдең дә тәҡдимдәренә ярашлы булған тейешле аныҡлауҙар һәм өҫтәмәләр индерелде.

Совет Хөкүмәте, был Договорҙың СССР менән Финляндия араһында киң һәм дуҫтарса хеҙмәттәшлеккә булышлыҡ итәсәгенә, был Договорға ҡул ҡуйыуҙың беҙҙең государстволарыбыҙ халыҡтары тарафынан ғына түгел, бәлки тыныслыҡтың һәм прогрестең бөтә дуҫтары тарафынан да ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршы алынасағына ышаныс белдерә.

СССР һәм Финляндия халыҡтары араһындағы союз һәм дуҫлыҡ йәшәһен һәм ныҡһын!

Премьер-Министр әфәнде, һеҙҙе һәм Финляндия хөкүмәтенең бөтә делегацияһын совет-финляндия мөнәсәбәттәренең яңы нигеҙен һалыусы Договорға ҡул ҡуйыу менән ҡотларға рөхсәт итегеҙ.

ПЕККАЛА әфәнде телмәре

Генералиссимус әфәнде, Сит ил Эштәре Министре әфәнде, Министр әфәнделәр, әфәнделәр!

Беҙ Советтәр Союзы менән Финляндия араһында төҙөлгән мөһим Договорға ҡул ҡуйҙыҡ. Ярашыу Договорын төҙөгәндән һуң был ике ил өсөн дә ҙур әһәмиәтле акт булып тора. Унда һуғыштан һуң Советтәр Союзы менән Финляндия араһындағы дуҫлыҡҡа нигеҙләнгән тыныҡ политиканың ҙур өлгәшеүе күренә.

Финляндия делегацияһы һөйләшеүҙәр ваҡытында беҙҙең илебеҙгә һәм уның хөкүмәтенә ҡарата яҡшы мөнәсәбәт күрһәткән өсөн Советтәр Союзы делегацияһына һәм уның Председателе Сит ил Эштәре Министре Молотовҡа үҙенең рәхмәтен белдереүҙе һорай. Ошо яҡшы мөнәсәбәт арҡаһында беҙҙең айырым шарттарыбыҙға ярашлы һәм ике яҡты ла ҡәнәғәтләндереүсе һөҙөмтәләргә ирешеү мөмкин булды. Был беренсе ҡаршылыла уҡ асыҡ күренде. Был Договор Советтәр Союзы менән Финляндия араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәрҙе тағы ла күберәк тәрәҡҡи итеүгә һәм ныҡытыуға хеҙмәт итһен.

Финляндия делегацияһы Генералиссимус Сталиндең тәү башлап 1917 йылда уҡ Финляндия тураһында әйткән һәм фин халҡының хәтерендә мәңгегә ҡалған дуҫлыҡ һүҙҙәрен белә һәм яҡшы хәтерләй. Шуға күрә беҙ Генералиссимус Сталиндең үҙенең личнӧ ҡатнашыуы менән бында ҡул ҡуйылған актың әһәмиәтен билдәләргә теләү фактың — беҙҙең өсөн шатлыҡлы был фактыны айырыуса ҡәнәғәтләнеү менән билдәләйбеҙ.

Партия тормошо

Коммунистәр—социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүҙе ойоштороусылар

Алтай игенселәренең саҡырыуына ҡушылып, Тәтешле районы Крупская исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре быйыл сәсеү майҙанын 333 гектарға киңәйтергә, мул урожай үҫтереп алырға, мал һанын һәм уның продукты биреүсәнлеген күтәрергә йөкләмә алдылар.

—Йөкләмә алыу — ул ҙур эштең башланғысы ғына әле. Иң мөһиме — бирелгән вәғәҙәнең теүәл үтәлеүен тәьмин итеүҙән тора, — ти партия ойошмаһы секретаре иптәш Гәрәев.

Партия ойошмаһы социалистик ярышта алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн большевистик көрәште ойоштороусы, колхозсыларҙың патриотик ынтылыштарына йүнәлеш биреүсе етәксе көс булып тора. Коммунистәр колхоз производствоһының хәл иткес тармаҡтарына урынлаштырылдылар. Улар бригадаларҙа, малсылыҡ фермаларында һәм звеноларҙа ҙур ойоштороу-партия эштәре алып баралар.

Колхоз председателе — коммунист иптәш Алетдинов эш осоронда үҙен оҫта етәксе, ауыл эшсәндәренең ысын ҡожалы итеп танытты. Ул бөтә эште колхоз королошонон тейелмәҫ законы — ауыл хужалығы артеле Уставы нигеҙендә алып бара. Уның тырышлығы, инициативаһы менән колхоз яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тамамланы. Бөтә сәсеү майҙанына етерлек яҡшы сифатлы орлоҡ тупланды. Ауыл хужалығы машиналарына ремонт үткәрелде. Тракторҙар өсөн етерлек яғыулыҡ һәм майлау материалдары ташып ҡуйылды. Ҡышҡы агротехник сәралар планы ла арттырып үтәлде. Хәҙер арыш ужымын аҙыҡландырыуға һәм яҙғы ҡар һыуҙарын тотоуға әҙерлек эштәре алып барыла.

Коммунист иптәш Усманов яҙғы баҫыу эштәренә тартыу көстәрен әҙерләү бурысын намыҫ менән үтәне. Бөтә аттар һәм эш үгеҙҙәре яҡшы көрләктәләр. Коммунист Ғәбделхәй Хәйҙәров малсылыҡ фермаһында эш алып бара. Ул малдарҙы ҡышлатыуҙы, йәш малдарҙы ҡабул итеү һәм һаҡлау эшен өлгөлө итеп ойошторҙо.

Колхоздың коммунистәре үҙҙәренең бөтә партия-политик һәм ойоштороу эштәрен Бөтә Союз социалистик ярышҡа ҡушылып алған йөкләмәләрҙе үтәү маҡсатына яраҡлы итеп алып баралар.

М. Садретдинов.

Яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн көрәшәбеҙ

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының ҡарарын үтәү өсөн көрәшеп, Байрамғол МТС-ының механизаторҙары үткән йыл ҡайһы бер уңыштарға өлгәштеләр. Хеҙмәт етештереүсәнлеге бер ни ҡәҙәр күтәрелде, эштең сифаты яҡшырҙы.

Шулай ҙа, үткән йыл МТС коллективының эшендә ҙур етешһеҙлектәргә юл ҡуйылды. Трактор эштәренең йыллыҡ планы үтәп еткерелмәне. Урожайлыҡ та план менән билдәләнгәнгә ҡарағанда түбәнерәк булды.

Үткән йылғы хаталарҙың ҡабатланыуына юл ҡуймау өсөн һәм быйыл ауыл хужалығында яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн көрәшкә МТС-тың һәр бер эшсеһе йәлеп ителде. Бөтә эш социалистик ярыш нигеҙендә ойошторолдо. Шул арҡала ремонт эштәре ныҡлы ойошҡанлыҡ һәм ҙур хеҙмәт күтәренкелеге менән үткәрелде. Бөтә тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар план менән билдәләнгән сроктан ике ай алда, яҡшы сифатлы итеп ремонтланды.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлек эштәрен тамамлап, хәҙер инде уны ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн бөтә көстө туплайбыҙ. Бөтә колхоздар менән дә договорҙар төҙөштөк, улар колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарында ентекләп тикшерелеп ҡабул ителделәр.

Колхоздарға, трактор бригадаларына партия етәкселеген көсәйтеү маҡсатында, байтаҡ саралар үткәрҙек. ВКП(б)-ның Учалы райкомы ярҙамында «Искра», «Баләкәй түбә», «Большевик» һәм «Труд» колхоздарында партияның тәүге ойошмалары төҙөлдө. Бөтә политик-массовый эштәрҙе бына ошо тәүге партия ойошмалары менән берлектә үткәрәбеҙ. МТС хеҙмәтләндергән ике генә колхозда партия ойошмаһы юҡ. Был колхоздарға МТС-тағы партия активенан әҙерлекле коммунистәрҙе беркеттек.

Быйыл МТС коллективы Алтай крайы игенселәренең саҡырыуына ҡушылып бик яуаплы йөкләмәләр алды. Уларҙың теүәл үтәлеүен тәьмин итеү өсөн беҙ яҙғы баҫыу эштәре осорона агитацион-массовый эштәрҙең ентекле планын төҙөнөк.

Байрамғол МТС-ының механизаторҙары быйыл мул урожай үҫтереүҙе тәьмин итеү һәм ауыл хужалығында яңы уңыштарға өлгәшеү өсөн үҙ-үҙҙәрен аямайынса көрәшәсәктәр.

С. Тулыбаев,
Байрамғол МТС-ы директорының политик эш буйынса урынбаҫары.

Коммунистәрҙе идея-политик тәрбиәләүгә иғтибарһыҙ ҡараш

Район Советы исполкомы председателе иптәш Швалевкә киске партия мәктәбендә уҡырға кәңәш биргәс, ул:

— Минең ваҡытым юҡ, кәрәк булһа квартирама килеп уҡытһындар, — тип яуап бирҙе. Һуңынан уға, Кушнаренко педагогия техникумында ситтән тороп уҡып, дөйөм белем кимәлен күтәрергә тәҡдим иттеләр. Был юлы ла ул үҙенең тупаҫлығын күрһәтте:

— Ваҡһыныш, балалар менән бергә уҡыр хәлем юҡ, — тине ул.

Әгәр осраҡлы күренеш булһа, был хәлгә туҡтап тороуҙың кәрәге лә булмаҫ ине. Үкенескә ҡаршы, политик яҡтан артта ҡалған, үҙенең идея кимәлен күтәрергә теләмәгән кешеләр Баҡалы районында бер Швалев кенә түгел. Шул уҡ Швалевтең урынбаҫары иптәш Шакировты алайыҡ. Ул бер нәмә лә уҡымай, көндәлек яңылыҡтарҙы белмәй, партия һәм хөкүмәттең мөһим ҡарарҙары менән таныш түгел. Иптәш Шакиров социализмдең принциптарын, СССР-ҙың экономик һәм политик нигеҙҙәрен аңлата алмай, туғандаш компартияларҙың лидерҙарын белмәй. Район ауыл хужалығы һәм мәғариф бүлектәренең мөдирҙәре Байгуш һәм Хафизов иптәштәр менән дә шундай уҡ хәл.

Етәксе работниктарҙың үҙ белемдәрен күтәреү эшенә ошолай яуапһыҙ ҡарауҙары өсөн, беренсе нәүбәттә, ВКП(б)-ның район комитеты ғәйепле. Сөнки райком коммунистәрҙе идея-политик тәрбиәләү мәсьәләләренә бөтөнләй иғтибар бирмәй. Шунлыҡтан, райондағы етәксе работниктарҙан башлап, рядовой коммунистәргә тиклем, үҙенең политик кимәлен күтәреү өҫтөндә серьез эшләгән бер генә кеше лә юҡ, тиерлек. Райкомдың мәғлүмәттәре буйынса, 500 коммунист марксизм-ленинизм нигеҙҙәрен үҙ алдына өйрәнә. Ләкин ысынбарлыҡ быны кире ҡаға. Мәҫәлән, «Волга» колхозының тәүге партия ойошмаһында бер генә коммунист тә үҙенең белемен күтәреү өҫтөндә эшләмәй. Партия ойошмаһының секретаре иптәш Шакуров үҙе лә «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнә башламаған.

Етәкселек һәм конкрет ярҙам булмағанлыҡтан, политик мәктәптәр һәм ВКП(б) тарихын, иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү түңәрәктәре үҙҙәренең эштәрен туҡтатҡандар. Мостафа, Божор ауыл Советтары һәм «Красный Октябрь» колхозы партия ойошмалары эргәһендәге яҡшы эшләй, тип иҫәпләнгән политик мәктәптәрҙә лә занятиелар оноҫҡанда бер генә үткәрелә. «Коммунар» колхозы партия ойошмаһы эргәһендәге политик мәктәптә 3 кенә занятие үткәрелеп, шуның менән бөтә эш туҡтатылған. Нағайбаҡ, Карповка, Казанчы ауыл Советтары территориаль партия ойошмалары эргәһендә бынан 4—5 ай элек ойошторолған политик мәктәптәр эшкә башламағандар. ВКП(б) райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге, парткабинет, пропагандистәр политик мәктәптәргә бер төрлө лә ярҙам күрһәтмәйҙәр. Ә райком бюроһы был нормаль булмаған хәлгә килешеп ҡарай.

Х. Ғәлимов.

Мастерҙәрҙең ролен һәм авторитетен күтәрергә

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙә етәксе биш йыллыҡ планын дүрт йылда үтәү өсөн бөтә ил көрәшә. Производствола иң күп [illegible] командирҙар — мастерҙар [illegible]. Мастерҙарҙың участкала эште дөрөҫ ойоштора белеүҙәре, етештереүсәнлекте күтәреү буйынса [illegible] һәм ижади инициативалары эшселәрҙең нормаларҙы үтәүҙәре һәм арттырып үтәүҙәре [illegible].

Мәскәүҙең «Калибр» заводы мастеры Николай Российскийҙың коллектив стахановсы [illegible] Башҡортостан промышленность предприятиеларында [illegible]. Мастерҙар был алдынғы методты [illegible] өйрәнеп, уны [illegible] производствоға индереүҙәр һәм уның хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә мөһим сара булып торғанлығын үҙ практикаларында асыҡ күрҙеләр.

Өфө паровоздар ремонтлау заводында мастер иптәш Александр Равский, Николай Российский тәжрибәһе нигеҙендә эшләп, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә үҙ участкаһын тотош стахановсы итергә өлгәште. [illegible]

[illegible] ларҙы бер юлы башҡарырға өйрәтте. Хәҙер слесарь Догаев, Кузнецов һәм башҡа иптәштәр токарь, сварщик, медник булып эшләй алалар.

Технологик процестәрҙе үҙгәртеү, эшселәрҙе бер нисә профессияға өйрәтеү [illegible] методтарын индереү [illegible] максимум тығыҙларға һәм участкала [illegible] 6 эшсене икенсе участкаға күсерергә мөмкинлек бирҙе. Хәҙер иптәш Равский участкаһында 42 эшсе урынына 36 кеше эшләй.

Участкала эшсе кеше [illegible] ҡарамаҫтан, хеҙмәт етештереүсәнлеге ҡырҡа күтәрелде. [illegible] 200 процентҡа [illegible] —120 процент. Күпселек эшселәр 2—3 норма бирәләр. [illegible] Ефимов [illegible] Слесарь Купцов һәм медник Кузнецов иптәштәрҙең бригадалары [illegible].

Хәҙер иптәш Равскийҙың стахановсы участкаһы хозрасчетҡа күсте. [illegible] 5 мең 400 һум файҙа бирҙе.

Коммунист иптәш Равскийҙың бик ҙур производство тәжрибәһе бар. Ул техниканы яҡшы белә, коллективта ҙур хеҙмәт һәм авторитет ҡаҙана. Производствола һәр ваҡыт тәртип һәм дисциплина һаҡлай. Ошо көндәрҙә СССР тимер юл Министры иптәш И. В. Ковалев алдынғы мастерҙе сәғәт менән бүләкләне.

Иптәш Равскийҙың эш тәжрибәһе, [illegible]

[illegible]

шарттарҙа улар коллектив менән етәкселек итеү буйынса үҙҙәренең ролдәрен тулыһынса тормошҡа ашыра алмайҙар.

Ошондай уҡ фактылар заводтың башҡа цехтарында ла күҙгә [illegible]. [illegible]

Партия һәм хөкүмәт мастерҙарҙың эшенә һәр ваҡыт ҙур иғтибар бирә. ВКП(б)-ның XVIII Бөтә Союз конференцияһында [illegible]

[illegible]

С. Мәүлютов.

Марий АССР-ы ауылдарында үҙэшмәкәрлек киң йәйелдерелгән. Колхоз йырсылары, бейеүселәре, музыканттары һәм хор коллективтары халыҡ байрамдарында ауыл культура йорттарында, колхоз уҡыу өйҙәрендә сығыштар яһайҙар. Бында боронғо рус милли музыкаль инструмент-гуслиҙе лә яраталар. Еласов районында гусли уйнаусылар ансамбле боронғо һәм хәҙерге заман рус көйҙәрен башҡара.

Һүрәттә: Еласов районы гусли ансамблендә ҡатнашыусыларҙан колхозсы К. И. Панзоркина һәм Н. А. Ильзоркина.

А. Овечкин фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Яңы ауыл хужалығы машиналары

Краснодар крайының баҫыуҙарында «СК—24» маркалы орлоҡ һәм ашлама сәсә торған трактор сәскесенә һынау үткәрелде. Ул бөртөклө ашлыҡ культураларын да һәм бер үк ваҡытта минераль ашламаларҙы ла сәсеү өсөн эшләнгән. Сәскестең тупраҡҡа сошниктәр аша ашлама индерә торған махсус аппараты бар. Шуға күрә ашлама бөтә баҫыуға сәселмәй, тик орлоҡтар аҫтына ғына төшә. Был, урожайлылыҡты гектарына уртаса 2—3 центнерға арттыра.

Кировоградтың «Красная звезда» заводы яҡын көндәрҙә бындай сәскестәрҙең беренсе партияһын эшләп сығарасаҡ.

Рязанлең ауыл хужалығы машиналары заводы картуф йыйнай торған «КОК—2» маркалы комбайнды күпләп эшләп сығарыуға тотонды. Яңы машина бер үк ваҡытта картуфты ҡаҙый, уны һабаҡтарҙан айыра һәм һауыттарға тултыра. Комбайн 10 сәғәттә 4 гектар майҙандың картуфын йыйнай. Ҡул менән эшләгән ваҡытта быны өсөн 40—50 кеше кәрәк булыр ине. (ТАСС).

* * *

СТАЛИНО. (ТАСС). Ауыл хужалығы машиналарын төҙөү заводы илдең көньяҡ өлкәләре өсөн булған заказдарҙы үтәүҙе тамамланы. Украинаның, Краснодар һәм Ставрополь крайҙарының, Ҡырым, Молдавия ССР-ҙарының колхоз һәм МТС-тарына меңдәрсә трактор һәм ат һабандары ебәрелде.

Тамбов, Чкалов, Куйбышев, Челябе һәм башҡа өлкәләргә ауыл хужалығы ҡоралдарын оҙатыу башланды.

Почет Грамоталары тапшырыу

1948 йылдың 1 апрелендә фән работниктәренән, медицина, искусство һәм культура работниктәренең бер төркөмөнә Почет Грамоталары тапшырылды.

БАССР Верховный Советы Президиумының ҡушыуы буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы председателенең урынбаҫары иптәш И. Б. Долганов Башҡорт медицина институтының марксизм-ленинизм нигеҙҙәре кафедраһы мөдире—доцент Г. И. Масленниковҡа, Башҡорт медицина институтының микробиология кафедраһы мөдире — профессор Н. И. Мельниковҡа, Башҡорт государство филармонияһының йыр һәм бейеү ансамбле етәксеһе Ғ. К. Латиповҡа, Өфө ҡалаһының 9-сы номерле һөнәрселек училищеһы мастеры Х. В. Бархатовҡа, республиканың радио комитетенең һуңғы яңылыҡтар секторы редакторы И. Ғ. Ишмөхәмәтовҡа, физкультура эштәре комитетенең уҡыуы спорт бүлеге начальнигы В. Г. Черепанскаяға, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге полиграфия һәм издательстволар идаралығенең производство бүлеге начальнигы С. А. Тулаевҡа һәм башҡаларға Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет Грамоталарын тапшырҙы.

Наградланыусылар исеменән Г. И. Масленников сығыш яһаны.

Иптәш Долганов, наградаларҙы тапшырғандан һуң, бөтә иптәштәрҙе ҡотлап, киләсәктә уларҙың эшендә уңыштар теләне.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында

Промышленность предприятиеларының һәм артелдәрҙең 1948 йыл февраль айында социалистик ярыш йомғаҡтары

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республиканың урындағы промышленность предприятиелары, ҡала һәм район аҙыҡ комбинаттары, Башҡортостан промкооперациялары союздарының һәм артелдәренең 1948 йыл февраль айында социалистик ярыш йомғаҡтарын тикшерҙе. Түбәндәге предприятиелар социалистик ярышта еңеүселәр итеп табылды.

БАССР Аҙыҡ промышленносы Министерствоһының Өфө горпищекомбинаты (директоры иптәш Лешинский). Унда БАССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы ҡалдырылды һәм ярышта алдынғылыҡ күрһәтеүселәрҙе бүләкләү өсөн комбинатҡа 3 мең һум күләмендә аҡсалата премия бүленде.

Башҡортостан промкооперациялары управлениеһының директоры иптәш Супицкий булған заводына БАССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағы һәм алдынғыларҙы бүләкләүгә 15 мең һум күләмендә беренсе премия бирелде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Башметаллопромсоюзы (председателе иптәш Киселевич) промкооперация союздарының ярышында еңеүсе тип тапты һәм алдынғыларҙы бүләкләү өсөн уға 35 мең һум күләмендә премия бирҙе.

Икенсе урынды урындағы Промышленность Министерствоһы буйынса аҙыу машиналары заводы (директоры иптәш Ракитин), промкооперация управлениеһы буйынса «Канатчик» артеле (председателе иптәш Вассерман), өсөнсө урынды «Хлебопек-кондитер», «Пищевик» артелдәре алдылар. Социалистик ярышта алдынғылыҡ күрһәткән эшселәрҙе, инженер-техник работниктәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе бүләкләү өсөн аҙыу машиналары заводына 7,5 мең һум, «Канатчик» артеленә 7 мең һум күләмендә икенсе премия, «Хлебопек-кондитер» артеленә 4,5 мең һум, «Пищевик» артеленә 6 мең һум күләмендә өсөнсө премия бирелде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Архангель, Дыуан, Иглин район аҙыҡ комбинаттарының (директорҙары Ковалев, Козелов, Плесский иптәштәр), Промкооперация буйынса Өфө ҡалаһындағы «Металлист» (председателе иптәш Репников), «Металлург» (председателе иптәш Швидко), «Швейпром» (председателе иптәш Ғилманов), «Швейгалантерея» (председателе иптәш Доминов), «Текстильпром» (председателе иптәш Рабинович), Черниковск ҡалаһындағы «1 Май» (председателе иптәш Шабанов), Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы «Металлист» (председателе иптәш Ткаченко), Дәүләкәндәге «Пищевик» (председателе иптәш Солтанов), Октябрьск ҡалаһындағы «Марат» (председателе иптәш Әхлиуллин), Архангелдәге «Красная регилза» (председателе иптәш Литвин), Ломовка ауылындағы «1 Май» (председателе иптәш Мамыкин) артелдәренең февраль айында яҡшы эшләгәнлектәрен билдәләп үтте.

Район газеталарында урындағы яңылыҡтарҙы даими яҡтыртырға

Район газеталарында информациялар биреү мәсьәләһе редакция работниктәренең иғтибарын ныҡ йәлеп итергә тейеш. Информацион хәбәрҙәрҙә яңылыҡты газета уҡыусыларға еткерә барырға кәрәк. Шулай итеп, ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа хужалыҡ-политик кампанияларҙың барышын, партия, совет, хужалыҡ ойошмаларының һәм завод, фабрика, совхоз, МТС һәм колхоздарҙың эштәрен яҡтыртыу буйынса информацияларға киң урын бирергә кәрәк.

Район газеталарының бурыстары беҙҙең илдә партия һәм хөкүмәт тарафынан үткәрелгән бөйөк социалистик еңеүҙәр һәҙөмтәһен бөтә тулылығы менән күрһәтеүҙән тора. Беҙҙең илебеҙҙә бөйөк социалистик еңеүҙәр һәҙөмтәһен ҙур мәҡәләләрҙә күрһәтеү менән бергә, социалистик төҙөлештең һәр тармағындағы гүзәл миҫалдарҙы информацион хәбәрҙәрҙә колхозсылар һәм эшселәргә еңел аңлайышлы алымдарҙа фактылар менән күрһәтеп бирергә кәрәк.

В. И. Ленин фактылар менән агитация алып барыу эшенә бик ҙур әһәмиәт бирҙе. Беҙҙең газеталарыбыҙҙа яҙыла торған информациялар фактылар менән агитациялауҙың бер өлөшө ул. Информация — фактыларҙы дөрөҫ һәм бөтә тулылығы менән биреү, тигән һүҙ. Фактылар большевиктәр партияһы һәм Совет Хөкүмәтенең эшен хеҙмәтсәндәргә еткереүҙә, хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙә ғәйәт ҙур роль уйнайҙар. Тимәк, газеталарҙа бирелгән информациялар ысын мәғәнәһендә партиялы рухтағы хәбәрҙәр булырға тейешле.

Информацион хәбәрҙәрҙең характеры шунан тора, уларҙа фактылар үҙҙәре, бер ниндәй ҙә дөйөм һығымтаһыҙ биреләләр. Ләкин информация характерындағы материалдар шулай итеп ойошторолорға тейешле, газета уҡыусы хәбәрҙән килеп сығыусыҡ һығымтаны үҙе яһарға тейеш. Шуға күрә лә оҫта һәм ҡыҙыҡлы төҙөлгән һәр бер яңылыҡ, әйтәйек, стратосфераға осоуҙан алып, колхоз тормошондағы яңылыҡтар, хеҙмәт тәжрибәһендәге уңыштар, спорт һәм культура эштәрендәге яңылыҡтар, — былар бөтәһе лә беҙҙең илебеҙҙә үткәрелгән прогресс һәм ижади тырышлыҡтар, эшмәкәрлектәр тураһында һөйләйҙәр.

Информациялар район газеталарында күренекле урын алырға тейеш. Хәбәрҙәрҙең был төрөн тейешле кимәлдә биреү эшен редакция работниктәре, беренсе нәүбәттә редактор, үҙ ҡулдарына алырға, бының менән үҙҙәре көндәлек етәкселек итергә бурыслылар.

Информацияларҙың сығанаҡтары ҡайҙа, уларҙы ҡайҙан алырға?

Информацион хәбәрҙәрҙең иң мөһим сығанаҡтарының береһе — социалистик илдең һәр көнгө йәнле тормошо ул. Шуға күрә газета работниктәренән һәм уның хәбәрселәренән тормошто күҙәтә белеү, яҡшы нәмәләрҙе үҙ ваҡытында күреп, һайлап алып, киң массаға еткереү талап ителә.

Унан тыш, редакцияға үҙ ағышы менән килеп ингән материалдар ҙа информация өсөн, һис шикһеҙ, файҙаланылырға тейеш.

Урындағы яңылыҡтарҙы район газеталарында үҙ ваҡытында бирә барыу өсөн редакцияның хәбәрселәр селтәрен киңәйтергә кәрәк. Беренсе нәүбәттә, һәр бер редакцияның активы районлдың партия, совет, профсоюз, комсомол һәм бөтә төр хужалыҡ ойошмаларында, колхоздарҙа, мәктәптәрҙә булырға тейеш. Был сараны тормошҡа ашырмайынса газета биттәрендә информация ҡуйылышын бөтөнгә көндән [illegible] кимәленә күтәреү мөмкин түгел.

Тимәк, район газеталары алдында урындағы яңылыҡтарҙы систематик яҡтырта барыу буйынса ҙур һәм яуаплы бурыстар тора. Шуға күрә, республикабыҙҙың бөтә район газеталары редакциялары был мәсьәлә буйынса [illegible] яһарға бурыслылар.

М. Кәримов.

Социалистик Хеҙмәт Геройы

Өлкән механик Николай Тарасенко

1.

Сәсеүгә сығыр көндәрҙе көн генә ашҡынып көтмәне был яҙҙа. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы трибунаһынан Ватаныбыҙҙың өөтә мөйөштәренә лә яңғыраған сталинсе саҡырыу һүҙҙәре йөрәктәрҙә яңы дәрт, берҙәм ынтылыш тыуҙырҙы. Ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыу, юғары урожай өсөн көрәш башланды.

Был көрәштә еңеүгә ирешеү өсөн игенселек фронтының һәр работниген ҙур подвигтарға саҡыра ине тыуған партиябыҙ.

Ябай бер механизатор ғына түгел ине инде ул, коммунист Тарасенко. Уның инде етенсе йыл өлкән механик булып эшләүен МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙың бөтә колхозсылары ла бик яҡшы беләләр һәм үҙҙәре ашлыҡ сәсәсәк ерҙәрҙән дүрттән өс өлөшөн тракторҙар менән эшкәртеүҙә «машиналар докторының» намыҫлы хеҙмәт күрһәтәсәгенә ышаналар ине.

Николай Евдокимович үҙе тәрбиәләгән механизаторҙарҙың көсөнә, үҙ ҡулдары менән ремонтланған машиналарҙың бураҙнала туҡталып ҡалмаясаҡтарына шикләнмәһә лә, ул йылдың март һәм апрель айҙарында инде колхоздарға ебәрелгән тракторҙарҙы тағы бер тапҡыр ҡарап, тикшереп сыҡты. Сезон заданиеләрен арттырып үтәргә йөкләмә алған алдынғы трактористәр, бригадирҙар менән һөйләшеп, һабанға төшкәнгә тиклем ҡалған ваҡытты участкаларҙа тәжрибәләрҙе уртаҡлашыу өсөн техник кәңәшмәләр уҙғарыуҙы практикаға индерҙе. Шундай уҡ кәңәшмәләр һәр ун көн һайын МТС күләмендә үткәрелә башланы. Шартлы һәр бер тракторға 1.000-әр гектар ер һөрөүҙе бөтә бригадаларҙа ла эшкә ашырып булдамы? Был мәсьәлә буйынса Виктор Желобецкий, Тихон Алехин техник кәңәшмәләрҙә махсус докладтар менән сығыш яһанылар, үҙҙәренең эш тәжрибәләрен һөйләнеләр. Ямғырлы көндәрҙә трактор тәгәрмәстәренә уширителдәр ҡуйыу, техник тәрбиә графиген машина частәренең эксплоатацияла күпме ваҡыт булыуҙарына ҡарап төҙөү, төнгө сменаларҙа тулы нагрузка менән эшләүҙе тәьмин итеү тураһындағы фекерҙәр тап бына ошондай кәңәшмәләрҙә тәжрибә алышыу, бер-береңә ярҙам итеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килде.

Алдынғы фекерҙе — яңы, файҙалы тәжрибәне һәр бригаданың, һәр трактористең баҫыуҙа, үҙ участкаһында ҡулланып эшләр көндәр еткәс, Николай Евдокимович, МТС усадьбаһына һирәк-һирәк кенә ҡайтып йөрөргә иҫәп тотоп, үҙе ойоштороған күсмә мастерской менән колхоздарға китте. Ремонт үткәреү өсөн кәрәкле инструменттар ҙа, запас частар ҙа, тракторисҡә йәйге эштең бөтә этаптарында ла һабаҡ бирерлек техник уҡыу китаптары ла бар ине был күсмә мастерскойҙа.

Көндөҙҙәрен дә, төндәрен дә, ҡайһы трактор бригадаһына ашығыс техник ярҙам кәрәк булһа, шунда һис кисекмәҫтән барып сыға торған булды Николай Тарасенко. Салауат исемендәге колхозда ер һөрөүсе йәш тракторист Хәйбуллинға һаҡһыҙлыҡ арҡаһында иретелгән подшипниктарҙы ҡайтанан ҡойоп бирҙе ул, культивацияла эшләүсе Дмитрюкка машинаның магнетоһын ремонтлауҙа булышты...

Улар кеүек аҙ тәжрибәле йәш трактористәр МТС-та берәү-икәү генә түгел ине әле. Машиналарҙы бураҙнанан сығармайынса, бер генә минут ваҡытты ла бушҡа үткәрмәйенсә, техник ярҙам күрһәтеүҙә бөтә сезон буйынса өлкән механик ныҡышмалы эш алып барҙы.

Ләкин механизаторҙарҙың ерҙе сифатлы итеп эшкәртеүҙәрен, юғары урожай өсөн намыҫ менән тырышып эшләүҙәрен тәьмин итеүҙә беренсе нәүбәттәге бурыс ине..

2.

«Ҡыҙыл Урал» колхозында эшләүсе трактористәр эргәһенә Николай Тарасенко һөрөү эштәренең иң ҡыҙыу осоронда барып сыҡты. Бригада менән етәкселек итеүҙә байтаҡ ҡына тәжрибәһе булған Байков өлкән механикте күргәс тә, машиналарҙың яҡшы ремонтланған булыуҙарын маҡтап, әлегә бер төрлө лә техник ярҙамға мохтаж булмауын әйтеп ҡуйырға ашыҡты. Обсҡай тәбәге эргәһендәге киңлектә буйҙан-буйға ҡаралып ятҡан ерҙәрҙә ус төбө тиклем дә сей ҡалдырылған, тип әйтерлек түгел ине. Өлкән механик менән бергә баҫыуға килгән колхоз председателе Сәйетгәрәев тә һөрөүҙең сифатын маҡтап торҙо: бураҙналар 22—23 сантиметр тәрәнлектә.

Бергәләп баҫыуҙы әйләнеп йөрөп ҡайтҡас, күсмә вагончик эргәһендә бер нисә минутҡа ғына тәмәке тартырға туҡталдылар. Шунда ла Николай Евдокимович ваҡ-ваҡ ҡына ҡалҡыулыҡтар менән биҙәкләнгән майҙанда ярты километр самаһы арала әйләнеп ер һөрөүсе ике трактордан күҙен алманы. Бер-бер артлы теҙелгән был яҫы ҡалҡыулыҡтар аҡрын ғына тирбәлгәндә туҡталып ҡатып ҡалған диңгеҙ тулҡындарын хәтерләтәләр. Әйтәйек, был баҫыуҙы диңгеҙҙең бер өлөшө итеп күҙ алдына килтерһәң, ошондай тулҡындарҙы ярып барған катер, һыу ҡаршылығына осрағанда, үҙенең хәрәкәт тиҙлеген кәметер инеме?

Николай Евдокимович бригадирға ошо һорауҙы бирҙе. Байков, һүҙҙең нәмәгә ҡағылғанын төшөнөп бөтмәһә лә, һуҙылып ятҡан урынынан тороп уҡ ултырҙы.

— Минеңсә, катер уңдай тулҡындарҙы кәмселгән тиҙлек менән үтер ине, — тине ул бер аҙ уйлап торғас.

— Улайһа, ниңә һинең тракторҙарҙың ҡалҡыулыҡтарҙы үткәндә лә шул бер үк тиҙлек менән баралар.

Моторҙар тауышын тын да алмайынса тыңлап торҙолар.

— Бындай һөҙәк ҡалҡыулыҡтарҙы һөргәндә тиҙлекте алыштырырға кәрәкме икән... — тине Байков.

Бригадирҙең хатаһын ҡул менән үҙенә күрһәтергә мөмкин булғанда, һүҙ оҙайтып тороуҙың кәрәге юҡ ине. Улар өсәүләп әлеге ҡалҡыулыҡтар яғына киттеләр. Бураҙналар, тигеҙ урындағыға сағыштырғанда, 4—5 сантиметрға һайығраҡ булып сыҡты. Юҡ, өлкән механик Тарасенко бындай эшкә юл ҡуя алмай ине. Шул һүҙҙәрҙе ишетеү менән колхоз председателе Сәйетгәрәев уның ҡулдарын ҡыҫты:

— Бына был эш тиһәң дә эш, немаһам! Ике арала төҙөшкән договорҙы еренә еткереп үтәү тиһәң дә була быны. Шулай ҙа, Николай Евдокимович, әйт әле миңә: механик кеше мотор тауышын тыңлағанда уның тәҙәкме, түгелме икәнлеге тураһында ғына уйларға тейеш түгелме ни?

3.

Совет механизаторы тулы төҙөклөктәге моторҙың һәр бер әйләнеше алынасаҡ урожайҙың мул булыуы өсөн кәрәклеген, ашлыҡты сәсеүсе һәм тәрбиәләп үҫтереүсе колхозсы кеүек үк, белергә, шул маҡсатҡа өлгәшеү өсөн үҙенең бөтә көсөн бирергә тейеш.

Ошо шарт еренә еткерелмәгәндә, Дәүләкән МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздар уҙған йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә майҙанында һәр гектарҙан уртаса 12,82 центнер, ә 610 гектар арыштың һәр гектарынан 21,53 центнер урожай ала алмаҫтар ине. Өлкән механик Николай Тарасенко трактор паркының бөтә ауыл хужалығы йылы дауамында техник яҡтан тулы төҙөклөктә булыуы өсөн, механизаторҙарҙың яңы хеҙмәт күтәрелештәренә ынтылыуҙары өсөн. МТС-тың башҡа етәкселәре менән берлектә большевистик ныҡышмалыҡ күрһәтеп эшләмәһә, был гүзәл уңыштарҙы күҙ алдына ла килтереп булмаҫ ине.

Үҙенә социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреләү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указын уҡығанда, Николай Евдокимович алдағы йылдарҙа Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен нығытыу өсөн башҡарыласаҡ эштәр тураһында уйлай, үҙенең механизаторҙарын иген өсөн көрәштә яңы подвигтарға алып барырға әҙерләнә.

Ғ. Әхмәтшин.

Ужымдарҙы аҙыҡландырыуға әҙерләнмәйҙәр

Быйыл яҙ Салауат районы колхоздары байтаҡ майҙанда ужымды өҫтәмә аҙыҡландырырға, 9 мең гектар сәсеүлекте тырматырға тейештәр. Алдан ныҡлап әҙерләнгәндә һәм етерлек ашламалар туплап ҡуйғанда ғына был эште уңышлы үтәп буласаҡ.

Үкенескә ҡаршы, күпселек колхоз етәкселәре был мөһим сараны баһалап еткермәйҙәр әле. Ҡош тиҙәге һәм урындағы башҡа ашламалар әҙерләүҙе бик ваҡ эш итеп иҫәпләйҙәр.

«Путь социализма» ауыл хужалығы артеле етәкселәре сәсеүгә ҡыш бер ниндәй ҙә әҙерлек алып барманылар. Улар «ҡыш оҙон, өлгөрәрбеҙ әле» тип уйланылар. Ә хәҙер, баҫыу эштәре башланыуға аҙна-ун көн ваҡыт ҡалғас, аптырап ҡалдылар. Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға бик күп көл, ҡош тиҙәге һәм тиреҫ шыйыҡсаһы талап ителә. Ә бында ни бары 9 центнер көл йыйналған. Тиреҫ сығарыу планының дүрттән бер өлөшө лә үтәлмәгән. Звенолар формаль рәүештә генә ойошторолғандар. Күпселек звено члендәре хатта үҙҙәренең ҡайһы звенола эшләйәсәктәрен һәм звеноводтарының кем икәнен дә белмәйҙәр. Колхоз председателе Сәетгәлин һәм баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙарынан Хәсәнов һәм Хисмәтуллин иптәштәр ошо көнгә тиклем звеноларға участкалар беркетмәгәндәр. Звеноводтар эште нәмәнән башларға кәрәклекте белмәйҙәр.

«Башташ» колхозында ла шундай уҡ хәл. Колхоз председателе иптәш Ишморатов «һалыр урын юҡ» тип, урындағы ашламаларҙы ер кипкәс кенә әҙерләй башларға иҫәп тота. «Сыбаркүл», «Игенсуҡ», «Ҡояш», «Радио» «Бирҙәш», «Красный Урал» ауыл хужалығы артелдәре лә ужымдарҙы аҙыҡландырыуға бер ниндәй ҙә әҙерлек алып бармайҙар.

Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Йомағужин һәм баш агроном Исхаков иптәштәрҙе был хәл һис борсомай. Улар хатта айырым колхоздарҙа сәсеүгә әҙерлек эшенең нисек барыуын, эш пландарының төҙөлөү, йәки төҙөлмәүен дә белмәйҙәр. Бары тик март айы аҙаҡтарында ғына ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу буйынса план төҙөүгә башланылар.

Райондың колхоздарында арыштан юғары урожай алыу өсөн тулы мөмкинлектәр бар. Алдынғы хужалыҡтар был өлкәлә бай тәжрибә тупланылар. Мәҫәлән, «Әй», «Нур», «Новая жизнь», Гузаков, Пушкин һәм Крупская исемендәге колхоздар юғары урожай алдылар. «Әй» колхозында иптәш Мөхәмәтьянов етәкселек иткән звено, Гуҙаков исемендәге колхозда иптәш Серов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы арыштың һәр бер гектарынан 25—28-әр центнер урожай алыуға өлгәштеләр. Быны өсөн улар бик күп хеҙмәт һалдылар. Ҡыш көнө сәсеүлектәр өҫтөндә ҡалын итеп ҡар тотоу үткәрҙеләр, беренсе тапҡыр ужым сәсеүлеген көл менән, ә икенсе тапҡыр ҡош тиҙәге һәм тиреҫ шыйыҡсаһы менән өҫтәмә аҙыҡландырҙылар. Был сара уларға арыштың һәр бер гектарынан 5—8 центнер өҫтәмә урожай алыуға мөмкинлек бирҙе.

Был колхоз члендәре быйыл арыштан тағы ла юғарыраҡ урожай алыу бурысын ҡуйҙылар. Ҡыш ужым сәсеүлектәрендә ике тапҡыр ҡар тотоу үткәрҙеләр. Звенолар хәҙер ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыуға ныҡлы әҙерлек алып баралар.

Район ауыл хужалығы бүлеге специалистәре алдынғыларҙың был эш тәжрибәләрен бөтә колхоздарҙа, звеноларҙа ҡулланырға, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә агротехник сараларҙың тулыһынса үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр ине. Ләкин был өлкәлә бер нәмә лә эшләнмәй әле.

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Халк өсөн түгел, үҙ интерестәре өсөн йәшәйҙәр

Маҡар район аҙыҡ промышленносе комбинаты үткән йыл бик бәләкәй план менән эшләне — йыл буйына 25 мең һумлыҡ продукция эшләп сығарырға тейеш ине. Ләкин ул план да ни бары 0,5 процентҡа үтәлде.

Комбинатта эш бармаһа ла, унда эшләүсе работниктарға үҙған йылда 40 мең һум самаһы хеҙмәт хаҡы түләнде.

Ағымдағы йылда ла комбинатта эш яҡшырманы. Февраль айына билдәләнгән 1300 һум күләмендәге план бер процентҡа лә үтәлмәне.

Был тиклем ҙур зыян менән эшләүҙең сәбәбе нәмәлә һуң? Ул, комбинат етәкселәренең, беренсе нәүбәттә уның директоры Гутовтың үҙҙәренә тапшырылған бурысты үтәүгә яуапһыҙ ҡарауҙарында, общественный байлыҡты үҙләштереүҙәрендә.

Район аҙыҡ промышленносен аяҡҡа баҫтырыу өсөн мөмкинлектәр күп. Бында ҙур сәсеү майҙаны, 2 ат, 3 эш үгеҙе, 9 һауын һыйыр һәм 20 баш һарыҡтан торған малсылыҡ хужалығы бар. Ләкин был байлыҡтар күбеһенсә етәкселәрҙең үҙ интерестәре өсөн файҙаланыла, Мәҫәлән, үҙған йылда һарыҡтарҙан алынған 50 килограмм йөндөң 37 килограмы, 10 центнер картуфтың 5 центнеры, 9 умартанан алынған бал, һыйырҙарҙан алынған һөт һәм май — бөтәһе лә аппаратта эшләүселәрҙең үҙҙәрен тәьмин итеүгә тотолдо.

Эш шуға тиклем барып етте. Үҙған йыл райпищепромға БАССР Аҙыҡ промышленносе Министерствоһынан 15 тонна тоҙ алынғайны. Тоҙ пищепром директоры Гутовтың бойороғо менән колхоз баҙарында ҡиммәт хаҡ менән һатылды. Шунан йыйылған аҡса хеҙмәт хаҡы ширмаһы аҫтында сотрудниктарға өләшеп бирелде. Шул уҡ сәбәпте һылтау итеп, бер һыйыр һуйып һатылды. Бындай хужаһыҙлыҡтар, общественный байлыҡты үҙләштереү фактылары күп. Райпищепром етәкселәре халҡ өсөн түгел, үҙҙәренең личный интерестәре өсөн генә йәшәйҙәр.

Шуныһы ғәжәп, был енәйәтсел хужаһыҙлыҡты, общественный байлыҡты туҙҙырыу фактыларын Маҡар район Советы исполкомы етәкселәре яҡшы беләләр, ләкин бер төрлө лә сара күрмәйҙәр.

С. Сәйфуллин.

Өфөлә төҙөлөш материалдары һатыу магазине асырға кәрәк

Башҡортостандың үҙәге булған Өфө ҡалаһында Бөйөк Ватан һуғышына тиклем төҙөлөш материалдарын һатыу махсус бер магазинға («Строймагка») тупланғайны. Ул дөйөм торлаҡтарҙы һәм хеҙмәтсәндәрҙең индивидуаль торлаҡтарын ремонтлауға талап ителгән төрлө төҙөлөш материалдары менән хеҙмәтләндереүҙә ғайәт ҙур роль уйнаны. Ләкин һуғыш ваҡытында был магазин ябылғайны.

Хәҙер совет халҡы Бөйөк Ватан һуғышын еңеүле рәүештә тамамлап, өсөнсө йыл инде халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү буйынса ҙур төҙөлөш эше алып бара. Республикабыҙҙың промышленносе төҙөлөш материалдарын байтаҡ күләмдә эшләп сығара. Был төҙөлөш материалдарын бергә туплап һатыу һәм хеҙмәтсәндәрҙең төҙөү материалдарына булған талаптарын ҡәнәғәтләндереү өсөн ҡалала махсус төҙөлөш материалдары һатыу магазине асыу бик актуаль мәсьәлә булып тора.

Беҙ, Башҡортостан сауҙа Министерствоһы Өфөлә бындай магазинде йылдам асыу сараһын күрергә тейеш, тип иҫәпләйбеҙ.

Инженер Ф. Качкин.

Яңы специалистәр

Шоферҙәр әҙерләү буйынса республикан мәктәп ағымдағы йылдың 1 кварталында 260 шофер әҙерләп сығарҙы. Шул иҫәптән, Бәрә һәм Яңауыл бүлексәләрендә 70-әр яңы специалистәр әҙерләнде.

Йәш шоферҙәр машина йөрөтөүгә хоҡуҡ алып, колхоздарға, совхоздарға һәм предприятиеләргә эшкә киттеләр.

1948 уҡыу йылында был системала тағы ла 690 шофер әҙерләнәсәк.

Башҡортостан йәш нефтселәренең икенсе слеты

Ошо йылдың алтынсы апрелендә йәш нефтселәрҙең икенсе слеты булып үтте. ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә Комитеты тарафынан саҡырылған был слетта нефть промышленносеның сәскәләре — нефть сығарыусы, бораулаусы, эшкәртеүсе, машина һәм оборудованиеләр эшләүсе иң алдынғы йәштәрҙән 150-нән артыҡ кеше ҡатнашты.

ВЛКСМ Өлкә Комитетенең секретаре иптәш Саяпов слетты асҡандан һуң, «Башнефть» берекмәһенең начальнигы иптәш Кувыкин нефть биш йыллығын дүрт йылда үтәү өсөн көрәштә йәш нефтселәрҙең бурыстары тураһында доклад яһаны.

Иптәш Кувыкин үҙенең докладында Башҡортостан нефтселәренең үткән йыл өлгәшкән уңыштары тураһында һөйләй.

— Нефть сығарыу һәм эшкәртеүҙә өлгәшкән уңышта, — ти докладсы, — республика нефть промышленносендәге бөтә эшселәрҙең 42 процентен тәшкил иткән йәштәр ҙур роль уйнанылар. Үткән йыл йәштәрҙән 2940 кешенең норманы арттырып үтәүе быны асыҡ миҫалы булып тора. Бигерәк тә Октябрьск нефтселәренең, Черниковск һәм Ишембай нефть эшкәртеүселәренең, Благовещен заводының уңыштарында йәштәрҙең батыр хеҙмәттәрен айырыуса билдәләп үтергә кәрәк.

— Әгәр, — ти иптәш Кувыкин, һүҙен дауам иттереп, — үткән йылда «Ишембайнефть», «Башнефтеразведка» трестары ла алдынғылар кеүек эшләһәләр, беҙҙең уңыштарыбыҙ тағы ла яҡшыраҡ булыр ине. Ләкин улар насар эшләнеләр. Быйыл беренсе кварталда нефть сығарыу, бораулау пландарының үтәлеп еткерелмәүе, нефть эшкәртеүселәрҙең дә эш темпы тейешле кимәлдә булмауы беҙҙең эшебеҙҙә ҙур кәмселек булып тора. Тимәк, был, йәш нефтселәрҙең дә серьез кәмселегә, тигән һүҙ.

Иптәш Кувыкин планды үтәүсе трестарҙы, промысел һәм бораулау контораларын, бигерәк тә «Башнефтеразведка», «Ишембайнефть» трестарын, тимер юлдың Өфө бүлексәһен ҡаты тәнҡит аҫтына алып, сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында Башҡортостан нефтселәре, шул иҫәптән йәш нефтселәр алдында торған конкрет бурыстарға ентекле рәүештә туҡтала.

— Быйыл, — ти иптәш Кувыкин, докладының аҙағында, — Ленин—Сталин комсомолы үҙенең 30 йыллығын байрам итәсәк. Беҙҙең йәш нефтселәребеҙ был данлы датаны хеҙмәттә яңы еңеүҙәр менән билдәләү, нефть биш йыллығын дүрт йылда үтәү өсөн ең һыҙғанып эшләүҙәр һәм республика нефть промышленносенең тағы ла алға китеүен тәьмин итерҙәр.

Докладтан һуң йәнле фекер алышыуҙар башланды. Иң беренсе булып «Ишембайнефть» тресының икенсе промыселендәге мастер ярҙамсыһы иптәш Левашев һүҙ алды. Ул үткән йыл промыселдең пландан тыш меңдәрсә тонна нефть биреүе, эшләмәй ултырған 22 скважинаны эксплоатацияға тапшырыуҙары, мастерҙар Вахитов, Давидов иптәштәр етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаларының, ер аҫты ремонты эшселәре Ғабитов, Хәмитов һәм башҡа иптәштәрҙең фидаҡәр хеҙмәттәре тураһында һөйләй.

— Промысел йәштәре исеменән, —ти ул һүҙенең аҙағында,—нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын Ленин — Сталин комсомолының утыҙ йыллығы көненә, йәғни 29 октябргә үтәргә, эшләмәй ултырған ике скважинаны йәштәр көсө менән эксплоатацияға тапшырырға һүҙ бирәм.

Трибунаға Черниковск нефть эшкәртеү заводының операторы иптәш Тюрин күтәрелә. Ул үҙе эшләгән цехта бөтә эшселәрҙең 85 проценте комсомолец-йәштәр булыуын әйтеп, нефть эшкәртеү планын систематик рәүештә арттырып үтәүҙәре тураһында һөйләй.

— Беҙҙең завод,—ти Ишембай нефть эшкәртеү заводының комсоргы иптәш Ильин,—планды систематик рәүештә үтәй. Бында йәштәрҙең хеҙмәте лә ҙур. Йәштәр, намыҫлы эшләү менән бер рәттән, уҡырға ла теләйҙәр. Сөнки техника үҫә, талап ҙурая. Ләкин уҡырға мөмкинлек юҡ. Асылған киске техникумға алмайҙар. Ул тик партия горкомы, ҡала Советы, ҡала профсоюз комитеты работниктары менән комплектовать ителгән. Ә эшселәргә ҡайҙа уҡырға? Йәш эшселәрҙе уҡытыуға бындай ҡараш һис урынлы түгел.

«Туймазынефть» тресының алдынғы йәш бораулаусылары Рябов һәм Зверев иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

— Мин,—тине иптәш Рябов, —нефтсе булыуым менән ғорурланам. Республиканың алдынғы промышленность тармағында эшләүен баһалай белгән кеше, артта ҡала алмай. Комсомолдың данлы утыҙ йыллығы хөрмәтенә быйыл станок-айға 1000—1200 метр тиҙлектә бораулауға һүҙ бирәм.

Благовещен нефть машиналары эшләү заводының комсомолец-йәштәр бригадаһы бригадиры Похрин, «Ишембайнефть» тресының беренсе промыселендәге мастер ярҙамсыһы Фролов, «Туймазынефть» тресынан Шагалиев, Казаченко, Положенцев, Черниковск нефть эшкәртеү заводынан Еденкина, Недогарок иптәштәр үҙҙәренең сығыштарында йәштәрҙең етештереүсәнлекле эшләүенә комасаулаған серьез етешһеҙлектәрҙе астылар һәм уны йылдам бөтөрөүҙе талап иттеләр. ВЛКСМ-дың Октябрьск, Ишембай ҡала комитеттәре секретарҙәре Ашин һәм Мырҙағалиев иптәштәр йәш эшселәр араһында культура-массовый эш алып барыу, уҡыу һәм тәжрибәләр менән уртаҡлашыу өсөн биналар булмауы, ҡала профсоюз комитеттәренең бындай сараларҙы үткәреүгә клубтарҙы рөхсәт итмәүҙәре тураһында һөйләнеләр.

Нефть институтының директоры Рубенштейн, «Башнефтезаводтар» берекмәһе управляющие Вовченко, «Башнефть» берекмәһенең баш геологы Трофимук, ВЛКСМ Өлкә Комитеты секретаре Саяпов иптәштәр үҙҙәренең сығыштарында йәш нефтселәрҙең иғтибарын алда торған мөһим бурыстарға тупланылар.

ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре иптәш Должных үҙенең сығышында йәштәрҙең революция, граждандар һуғышы, сталинсе биш йыллыҡтар һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдары осоронда ҙур ролдәре тураһында һөйләп, бөйөк Сталин ихтыяры менән барлыҡҡа килтерелгән «Икенсе Бакуҙы» артабан үҫтереүҙә йәш нефтселәрҙе арымай-талмай эшләргә, Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығын хеҙмәттә яңы еңеүҙәр менән ҡаршыларға саҡырҙы.

Слетта ҡатнашыусы йәш нефтселәр конкрет йөкләмәләр алып, Башҡортостандың бөтә йәштәрен Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышҡа сығырға саҡырып мөрәжәғәт ҡабул иттеләр.

Слет аҙағында алдынғы йәш нефтселәрҙән 65 кеше ВЛКСМ Өлкә Комитетенең Почет Грамоталары менән һәм 21 кеше үҙҙәренең исемдәре яҙылған ҡул сәғәттәре менән наградланды.

Стахановсы йәш нефтселәрҙең икенсе слетында «Туймазынефть» тресынан ҡатнашыусы делегаттарҙан бер төркөм.

Һүрәттә: аҫҡы рәттә (һулдан уңға) 1. Н. Николаенко — газосварщик, 2. Э. Трожина — техник геолог, 3. А. Казаченко — мастер, 4. К. Блохина — бензин установкаһы техниге, 5. Н. Курочкин — механик мастерской техниге. Өҫкө рәттә (һулдан уңға) — 1. М. Кулакова — оператор, 2. А. Панов — монтаж эшенең балта оҫтаһы, 3. Е. Лоскутова — флюидке техниге, 4. Б. Набережной—комсорг, 5. А. Огородникова—плановик, 6. Е. Вертипорохова — замерщик, 7. Н. Яшичев — слесарь, 8. М. Валиуллина — оператор.

Б. Жданов фотоһы.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 5 апрель (ТАСС). Азат Греция радио станцияһы кисә Элефтери Эллада агентствоһының хәбәрен тапшырҙы. Унда, оҙаҡ дауам иткән артиллерия әҙерлегенән һуң демократик армияның пехота частәре 30 мартта Дидимотихон калаһына инделәр, тип әйтелә. Демократик армия частәре дошмандың казармаларына һәм Ставрупелистәге тимер юл станцияһына һәм Гостондағы пулемет нокталарына артиллериянан аттылар.

Радио станция шулай уҡ демократик армия верховный командованиеһенең белдереүен тапшырҙы. Унда 27 мартта демократик армияның коралланмаған боецтары колоннаһының походы уңышлы рәүештә тамамланды, тип әйтелә. Был колонна 20 февралдә Урта Грециянан сыҡты. Башта уның составында 400 кеше бар ине һәм ул зур булмаған коралды отряд ярҙамында Олимп-Пиерия районындағы азат ителгән территорияға үтеп инергә задание алды. Юлда колоннаға башҡа партизандар ҡушылдылар һәм юлдың аҙағына уның һаны 1200-гә барып етте.

Дошман походтың беренсе көнөнән үк адып колоннаны эҙәрләне һәм Олимп-Пиерия өлкәһендә өс пехота бригадаһы һәм «Милли гвардия» отрядтәре йыйланы. Монархистик фашистәр десле артиллерия һәм авиация уты менән колоннаны тар-мар итергә маташтылар, колонна дошман ҡулсаһынан үтеп сыкты һәм азат территорияға инде.

Грециялағы хәлгә карата

БЕЛГРАД, 5 апрель, (ТАСС). Азат Греция радиостанцияһы Эпир, Фессалия, Фракия һәм Пелопоннес секторында монархистик фашистарҙың демократик армия частәренә ҡаршы һуғыштарҙағы юғалтыуҙары тураһында Элефтери Эллада агентствоһының хәбәрен тапшырҙы. Монархистик фашистәрҙең 1 марттан 24 мартка тиклем булған осорҙа 120 һалдаты үлтерелгән, улар араһында 28 офицер һәм 1 генерал, 876 кеше яраланған һәм 583 кеше пленга төшкән. Пленга төшкән 243 кеше шунда уҡ үҙ иректәре менән демократик армия сафтарына индеиләр. 1 марттан 24 мартка тиклем булған осор эсендә монархистик-фашистик гаскәрҙәрҙән 36 кеше демократик армия яғына күскән.

Демократик армия частәре 753 винтовка, 71 автомат, 56 ҡул пулеметы, 2 ауыр пулемет, 14 миномет, 942 мина, 14 радиотелеграф аппараты, 244 мең патрон, 15 ящик һуғыш припастары, 150 ат алғандар. Ошо уҡ вакыт эсендә демократик армияның дошмандың килтереүсе отрядтәре 48 хәрби грузовикте, 3 танкыны, 1 тимер юлы составын, 16 күперҙе, 480 метр юл полотноһын һәм башкаларҙы шартлатҡандар.

Азат Греция радио станцияһы, шулай уҡ, азат Грецияның вакытлы халыҡ демократик хөкүмәте юстиция министре Порфирогенистең тәҡдиме буйынса закон сығарыу акты ҡабул итте, был акт кабинланган монархистик-фашистик хыянатсыларҙы демократик әскәргә булышыусы гражданарға йәки Греция демократик армияһының монархистик-фашистик властар ҡулында торыусы боецтарына алыштырыуҙы күҙҙә тота, тип хәбәр итте.

Элефтери Эллада агентствоһы. Солоникиҙәге монархистик-фашистик хәрби суды Греция демократик армияһы частәренең Солоники калаһында һәм уның тирә-яғында күрһәткән активлектәре өсөн репрессия сифатында Грецияның тағы ла 16 патриотын үлем язаһына хөкөм итте, тип хәбәр итә. Хөкөм ителеүселәр араһында 2 катын-кыҙ бар.

Азат Греция радиостанцияһының кисәге тапшырыуында монархистик-фашистик армия капитаны Т. Евстратиуҙың яҙма белдереүен иглан итте. Был капитанды демократик армия частәренең һалдаттары Эпирҙа пленга алғайнылар. Был монархистик-фашистең белдереүенән, Грецияның хакимлек итеүселәренең Грецияның демократик халкына террорҙы тормошка ашырыу өсөн ниндәй ысулдарҙан файҙаланғанлыктары күренә. Гадапис командаһындағы монархистик-фашистик батальонда ике палач бар: береһе Тевкак Эпирҙон — уның үҙенең әйтеүе буйынса, ул немец оккупацияһы вакытынан алып бөгөнгә көнгә тиклем 2 мең кешене үлтергән, икенсе ерәйтсе ошо уҡ осорҙа 700-гә яҡын гражданды үлтергән.

Александриялағы хәлгә карата

ЛОНДОН, 5 апрель. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәрсеһе Каирҙан түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: Александрияның порт өлкәһендә демонстранттар полицияның баш управлениеһына һөжүм иттеләр һәм бинаға яҡын торған факелдәр ыргыттылар һәм был бина шунда уҡ янды. Порт районында туктауһыҙ атыш ишетелеп тора. Полицейскийҙар һәм студенттар каланың урамындағы полиция участкаһында ташлар ырғыттылар, ғәскәрҙәр ут асты. Ғәскәрҙәр ут асырға приказ алғанға тиклем бөтә тәрәҙәләр ватылғайны инде.

Хөкүмәт круттары забастовканы һәм уның һөҙөмтәһендә килеп тыуған хәлде бик серьез тип иҫәпләйҙәр.

Польша эшселәр партияһы Үҙәк Комитетенең һәм Польша социалистик партияһы Үҙәк Башкарма Комитетенең бергәләп үткәргән ултырышы

ВАРШАВА, 5 апрель. (ТАСС). Варшавала Польша эшселәр партияһы Үҙәк Комитеты һәм Польша социалистик партияһы Үҙәк Башкарма Комитеты бергәләп ултырыш үткәрҙеләр.

Иглан ителгән коммюникела, түбәндәгеләр күрһәтелә: ултырышты Польша социалистик партияһы Үҙәк Башкарма Комитетенең председателе Русенек асты. Унан һуң Польша социалистик партияһының генеральный секретаре Циранкевичтең 1 майҙы бергәләп үткәреү турайындағы докладлы һәм Польша эшселәр партияһының генеральный секретаре Гомулканың берләшкән эшселәр партияһының үҙәк органдарын урынлаштырыу өсөн йорт төҙөү турайындағы докладлы тыңланды. Докладсылар тарафынан тапшырылган резолюциялар бер тауыштан раҫландылар.

Греция монархистик-фашистәренең Болгария сик буйы һаксыларына оятһыҙ рәүештә һөжүм итеүҙәре

Болгария хөкүмәтенең Берләшкән милләттәр ойошмаһына ебәргән телеграммаһы

СОФИЯ, 6 апрель, (ТАСС). Вице-премьер һәм сит ил эштәре министре Василь Коларов кисә Берләшкән милләттәр ойошмаһының генеральный секретаре Трюгве Лиға телеграмма ебәрҙе. Был телеграммала Афины хөкүмәте коралды көстәренең Болгария сик буйы һағына оятһыҙ рәүештә ҡылынған һөжүм итеүҙәренә ҡаршы Болгария хөкүмәтенең протесе яҙылған.

Телеграммала, 4 апрелдә көндөҙгө сәғәт 12-ләрҙә Марица йылғаһындағы, Свиленград өйәҙе Генералово ауылынан көньяҡ-көнбайышыраҡ, таулы утрауҙа 100-гә яҡын монархистик-фашист һәм жандары Болгарияның сик буйы һағына һөжүм иттеләр һәм Болгария һаҡ өс сик буйы һаксыһын үҙҙәре менән Греция территорияһына алып киттеләр, тип әйтелә. Һөжүм итеү вакытында грек тар баҫыуҙа эшләүсе болгар халкына пулеметтан һәм мылтыктарҙан көслө ут астылар.

Ошо оятһыҙ һөжүмгә ҡаршы протест белдереп, Болгария хөкүмәте Болгарияның ҡулға алынған сик буйы һаксыларын, һис кисекмәстән, азат итеүҙе һәм тәйенле кешеләргә аҙ биреүҙе һәм киләсәктә шундай көсләү актыларына юл ҡуймау өсөн саралар күреүҙе талап итә. Был талаптар үтәлмәгәндә, тип әйтелә телеграммала, Болгария хөкүмәте тейешле контр саралар күрергә мәжбүр буласаҡ.

Египеттәге хәл

ЛОНДОН, 6 апрель. (ТАСС). Лондон радиоһы Александрияла урамдарҙа йөрөүҙәр тыйылған, тип хәбәр итә. Ғәскәрҙәргә был тәртипте боҙоусы теләһә ниндәй кешене шунда уҡ атырға, тигән приказ бирелгән.

Александриялағы полицейскийҙар забастовкаһы Каир калаһына ла йәйелде. Броневашиналар һәм ҡул пулеметтары менән коралланған мотоциклистар кала урамдарын һаҡлайҙар.

Александриялағы тынысһыҙланыуҙар турайында Рейтер агентствоһы

ЛОНДОН, 5 апрель. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Каирҙан хәбәр итеүенә карағанда, бөгөн Египеттең премьер-министре Нокраши-паша баш күтәреүсе полицейскийҙарға һәм улар яҡлы кешеләргә ҡаршы алып барыла торған һуғыш операцияларына үҙе күҙәтеү алып барыу өсөн самолетта Александрияға осоп киткән. Каланың ҡайһы бер райондарында баш күтәреүсе полицейскийҙар яклы демонстанттар менән ғәскәрҙәр араһында урам һуғыштары бара. Урамдарҙа армия «Виллистәре» йөрөп тора. Уларҙан радио аша халыкты урамдарҙан китергә саҡырыла һәм ут асыу менән янайҙар.

Бейәләрҙе торокторау кампанияһын уңышлы үткәрергә

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа йылкысылыкты алға баҫтырыу һәм уны артабан үҫтереү бурысын үтәүҙә бейәләрҙе торокторау кампанияһы ҙур әһәмиәткә эйә.

Был кампанияны уңышлы үтәүгә өлгәшкән Әбйәлил, Учалы һәм Кыйгы райондары 1947 йылда йылкы малын үҫтереүҙең государство планын үтәп, 9—17 процентка үҫеш бирҙеләр. Әбйәлил районы «Салауат Батыр» колхозында С. Алсынбаев, Кыйгы районы Киров исемендәге колхозда С. Ғирфанов, Бүздәк районы «Октябрь» колхозында Әсәдуллин һәм башҡа күп иптәштәр үҙ фермаларындағы һәр бер бейәнән ҡолон алып үҫтерҙеләр. Ләкин беҙҙә һәр бейәнән ҡолон алыуҙы һәм уны үҫтереүҙе тәьмин итә алмаған колхоздар ҙа юк түгел. Мәҫәлән, Әлшәй, Балабай, Бөрө, Бөрйән, Краснокам һәм Өфө райондарының күпселек колхоздары шулар рәтенә инәләр. Уларҙа торокторау кампанияһына серьез иғтибар ителмәү, бейәләрҙе кыҫыр ҡалдырыу йәки ҡолон һалыуға юл ҡуйыу вакиғалары булды. Шул сәбәпле Краснокам районының 13 колхозында 1947 йылда 61 баш бейәнән бер генә ҡолон да алынманы. Әлшәй районы колхоздарында былтыр аттар һаны 10 процентка, ә Бөрйән районында 26 процентка кәмене.

Юғарыла күрһәтелгән фактылар быйыл бейәләрҙе торокторау кампанияһына серьез иғтибар биреүҙе һәм уны уңышлы үткәреүҙе талап итәләр.

Был кампанияны уңышлы үткәреү өсөн нәҫел айғырҙарын барларға, уларҙы торокторау пункттарына беркетергә кәрәк. Торокторау пункттарына урынлаштырылған айғырҙар ҡан яғынан үҙҙәренә тиң һәм юғарыраҡ булған бейәләрҙе торокторорға ебәрелергә тейеш түгелдәр. Бейәләрҙе пунктка йөрөтөү радиусы тәбиғи торокторау вакытында 5, ә яһалма торокторау вакытында 7—8 километрҙан артмаһын.

Торокторау алдынан айғырҙар ҙа һәм бейәләр ҙә яҡшы ашатылырға, тәрбиәләнергә һәм яҡшы көрләккә еткерелергә тейеш. Әҙерлек осоронда айғырҙарҙың сперма сифаты тикшерелә. Ә кампания осоронда уны тикшереү айына кәмендә бер тапҡыр үткәрелә. Спермаларҙы күбәйтеү өсөн айғырға һоло һәм көрпә ашатыла. Шулай уҡ, тәжрибәләр күрһәтеүенсә, тәүлегенә 10 данаға тиклем бешмәгән йомортка биреү ҙә файҙалы. Торокторға теләмәгән бейәләргә шыттырылған иген ашатырға кәрәк.

Яҙ иртә торокторау бейәләрҙең иртә ҡолонлауын һәм шуның менән уларҙы яҙғы баҫыу эшенә тулы файҙаланыу мөмкинлеген тәьмин итә. Шулай уҡ иртә тыуған ҡолондар ҡышҡы осорға ныҡып инәләр. Шул уҡ вакытта иртә ҡолонлаған бейәләр һәм уларҙың ҡолондары өсөн йылы тирләктәр булдырыу кәрәклеген дә онотоорға ярамай.

Тулы йәштәге таҙа айғыр өсөн тәбиғи торокторау нагрузкаһы 50, яһалма торокторғанда 100—150, ә өйөрҙә торокторғанда 25—30 баш бейә билдәләнә. Өс йәшлек һәм карт айғырҙар өсөн нагрузка 15 — 30 бейә. Көслө айғырҙарҙы тулы нагрузка менән файҙаланырға кәрәк. Яҡшы көрләктәге тулы йәштәге айғыр көнөнә ике тапҡыр (иртә һәм кис) торокторa ала. Пункттағы бөтә айғырҙарға аҙнаһына бер көн ял бирелә. Айғырҙы һәр көн 2-шәр сәғәт еңелсә тирләгәнгә тиклем егеп йөрөтөргә кәрәк.

Өйөрҙә торокторау өсөн дә әҙерлек эштәре талап ителә. Тышкы күренештәре менән окшашлы бейәләр бер көтөүгә бүленәләр, уларға айғырҙар бирелә һәм көтөүселәр беркетеләләр. Көтөүлек яландарында йәшел үләндәр сығыу менән үк, 20—30 апрелдә торокторау башлана.

Торокторау кампанияһы—йылкысылыкты үҫтереү планын үтәү өсөн көрәштә бик мөһим сара. Шулай булғас, бөтә малсылыҡ специалистәре, ат караусылар, табунщиктәр, ферма мөдирҙәре был эш менән серьез шөғөлләнергә һәм һәр бейәнең быуаҙ булыуына өлгәшергә тейештәр.

П. Царапкин,

БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының йылкысылыҡ управлениеһе өлкән зоотехниге.

Яңы китаптар

Ошо йылдың март айы аҙаҡтарында Башгосиздат күп кенә фәнни китаптар баҫтырып сығарҙы. Был башкорт һәм татар теленә тәржемә ителгән китаптар араһында профессор В. К. Никольскийҙең һәм профессор Н. Ф. Яковлевтең «Кешеләр һөйләшергә нисек өйрәнгәндәр» тигән китаптары бик әһәмиәтле һәм ҡыҙыҡлы китаптарҙың береһе.

Был китапта тел нәмә ул һәм телдең килеп сығыу серен кешеләр нисек асҡандар, хайуандар һөйләшәләрме, кешеләр ни өсөн һөйләшә башлағандар, кешеләрҙең тәү баштағы теле нисек булған һәм ни өсөн кешеләр бер вакытта ла бер генә телдә һөйләшмәгәндәр? тигән һорауҙарға миҫалдар менән тулы аңлатма бирелә. Китаптың тиражы 3000 дана.

Шулай уҡ академик Б. М. Заволовскийҙең «Йорт хайуандарының килеп сығыуы» тигән китабы Т. Баншев тәржемәһендә баҫылып сыкты.

Профессор И. Ғ. Кадировтың «Рак һәм саркома шеше турайында» тигән брошюраһы сыкты. Брошюра был ауырыуҙарҙың нисек килеп сығыуы һәм уларҙы ниндәй юлдар менән дауалау турайында һөйләй.

* * *

Когиздең Башкортостан бүлеге магазиндарына татар телендә түбәндәге китаптар килде: Инженер-механик Портновтың «Комбайндар», Погорелый, Чистяков, Комаров һәм Луканов иптәштәрҙең «Тракторҙарға ремонт яһау» тигән китаптар алынды.

Был китаптарҙың икеһе лә ябай, аңлайышлы телдә яҙылған. Улар МТС һәм совхоз эшселәре өсөн иң кәрәкле кулланма материал булып тора.

* * *

Башкортостан государство издательствоһы Лев Кассилдең «Миләтеңде һакла» тигән повесен башкорт теленә тәржемә итеп баҫтырыу.

Сәсеү кампанияһына плакаттар һәм „боевой листоктар“

Республикабыҙның государство издательствоһы яҙғы сәсеү осорона карата плакаттар һәм «боевой листоктар» сығара башланы.

Ошо көндәрҙә «Ужым ашлыктарын яҙ өҫтәмә ашлағандыңыҙ урожайлылыгын күтәреүҙә ышаныслы сара» тигән плакат баҫылып сығасаҡ. Был плакат үҫемлектәрҙе ҡасан һәм нисегерәк ашлағандыңыҙ, ашлағыстарҙы кулланыу һәм уны үткәреү юлдарын аңлатыусы бик әһәмиәтле кулланма материал булып тора.

Плакат рус, башкорт һәм татар телдәрендә 15 мең данала баҫыласаҡ.

Шул уҡ вакытта яҙғы сәсеү вакытында колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бригадалар, звенолар араһында эш барышын систематик яҡтыртып барыу өсөн стена газетаһы формаһында өс телдә лә «боевой листоктар» әҙерләнде. Улар «Союзпечать» аша тиҙ көндәрҙә республикабыҙҙың бөтә райондарына оҙатыла. Дөйөм тиражы 150000 дана.

Башланғыс класта уҡыусыларҙың яҙғы каникул көндәрендә. Һүрәттә: Мәктәп балалары йылға йыралар.

Г. Буравин фотоһы.

Концерт бригадаһы

Ошо көндәрҙә Башгосфилармонияның артистәре Ғ. Арсланов, З. Арсланова, З. Садретдинов, М. Шәйхелисламова составындағы концерт бригадаһы республикабыҙҙың райондарында булып ҡайтты.

Ул, Әлшәй, Миәкә, Стәрлебаш, Дәүләкән, Ишембай, Благовар, Бүздәк һәм башҡа райондарҙа бөтәһе 26 концерт ҡуйҙы. Концерттәрҙең күбеһе М. Горькийҙең тыуыуына 80 йыл тулыуға арналды. Репертуарҙа бөйөк яҙыусының «Ҡыҙ һәм әжәл» тигән әҫәре, «Егор Булычев» пьесаһынан өҙөктәр булды. Колхозсылар «Дәүләткошо», «Ыласын турайында йыр ҙы» артистка З. Арсланова башҡарылышында тыңланылар. «Тормош төбендә» пьесаһынан Сатин монологын Ғ. Арсланов башҡарҙы. Артистка З. Арсланова, шулай уҡ «Горькийҙең ижады һәм уның әҫәрҙәренең әһәмиәте» тигән темаға лекция уҡыны. Артист Садретдинов баянда халыҡ көйҙәрен уйнаны.

Концерт бригадаһын колхозсылар йылы ҡаршыланылар.

Агитколлектив етәкселәре һәм стена газетаһы редакторҙары өсөн семинар

Ошо көндәрҙә ВКП(б)-ның Дәүләкән райкомы агитколлектив етәкселәренең һәм стена газетаһы редакторҙарының семинарын үткәрҙе. Семинарға 50-нән артыҡ кеше катнашты. Семинарҙа катнашыусылар халыҡ-ара хәл турында лекция, яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү осоронда агит-массовый эш, баҫыуҙа эшләүсе колхозсылар араһында социалистик ярыш, яҙғы сәсеү эштәре барышын яҡтыртыуҙа стена газеталарының һәм культура-ағартыу учреждениелары работниктарының бурыстары тигән темаларҙа докладтар тыңланылар.

Район партия комитеты эргәһендә иң яҡшы стена газеталарының күргәҙмәһе ойошторолдо. Семинарға килеүселәр күргәҙмә менән танышып, үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Бәләкәй фельетон

Законһыҙлык—закон уларға

Кулы кул йыуа тигәр. Был физиологик яҡтан бик дөрөҫ һүҙ. Ләкин уны эш методы итеп кулланыу — зур енәйәт!

Черниковск калаһында 7-се, 19-сы номерле магазиндар бар. Кыҙғаныска карышы, был магазиндар тик һатыусылар өсөн генә түгел, сауҙа ойошмалары контролдан ситтә эш алып барыусылар өсөн дә ябыҡтар.

Гәжәп эш!.. Күптән түгел Черниковск калаһының сауҙа управлениеһы тикшереүсеһе Семенов 7-се номерле магазинде тикшерергә бара. Ләкин уға магазин директоры Безрукова тикшереү яһарға рөхсәт итмәй. Семенов үҙенең инструкцияһы һәм хокуҡы буйынса, магазинга пломба һала.

Безруковаға күп уйлап торайы ла юк! Ул партия кала комитетенең сауҙа бүлеге работнигe Кузнецовҡа йөгөрә. Кузнецовҡа Безрукова был хәбәрҙе килтереү менән, уның күҙҙәре ҙурайып китә. Һәм, ауыҙынан ашып тартып алған юлбарыҫ шикелле, ырғып тороп телефонга йәбешә. Телефон номерҙәрен йыя ла: — Был Истоминме, ә? Мин әйтәм торг директоры Истоминме был? — ти.

Телефондан ғәжәпләнгән Истомин тауышы ишетелә. Ул Кузнецовты тынысландырыу тауышы менән:

— Мин, мин иптәш Кузнецов. Тыңлайым һеҙҙе, нәмә бар?!

— Һин,—ти Кузнецов,—һин беҙҙең ябыҡ магазинде(?!) оноттоңмы ни? Ниңә уға тикшереү үткәрәһең? Хәҙер үк магазиндең пломбаһын алығыҙ! — ти.

Истомин нәмә эшләй алһын, шунда уҡ пломбаны алдыра...

19 мартта икенсе тапҡыр, ләкин инде был юлы Башкортостандың республикан государство сауҙа инспекцияһынан, инспектор Капаница шул уҡ 7-се номерле магазинде тикшереү өсөн килә. Арҡаланы кешеһе булғас, магазин директоры Безрукова:

— Беҙҙең магазинде бер кемдә лә тикшерергә хаҡы юк! Иптәш Умов һәм иптәш Кузнецовтың әмере шулай: магазинга бер тапҡыр ла тикшереү яһатмаҫка. Был ябыҡ магазин! — ти. Тикшереүсе иптәш Капаница, урындағы партия ойошмаһында эшләүсе, закон боҙоусы Кузнецовты, Умовтарҙы еңә алмай һәм ҡайтып сауҙа инспекцияһына был хәлде һөйләргә мәжбүр була...

Магазин һаман тыныс ҡына ҡала. Тикшереүселәргә был магазиндең эшен дә, ни өсөн ябыҡ ишек артында ғына сауҙа итеүҙе дә асырға мөмкинлек бирелмәй.

Шулай уҡ 19-сы номерле магазин дә һаман серле көйөнсә ҡала.

Ләкин СССР Министрҙәр Советенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1947 йылдың 14 декабрендә сығарған карары партия работниктәре Кузнецов һәм Умов торг директоры Истоминдар өсөн ҡасан закон булыр икән? Әллә улар өсөн закон яҙылмағанмы?

Рахман Кәлл.

Яуаплы редактор урынбаҫары

З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башкорт государство академия драма театрында. — «ХАЖИ ӘФӘНДЕ ӨЙЛӘНӘ». Киске 8 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — «СОВЕТ БАШКОРТОСТАНЫ».

«Салауатта» — «ГЕОРГИЙ СААКАДЗЕ». (I-се серия).

Матросов исемендәге кинола «КОНЕК-ГОРБУНОК», артистарҙан: Алейников, Ковалева һәм башҡалар ҡатнаша.

Башкортостан «Главкинопрокат» конторaһы «Царицынды обороналау» тигән революцион тарихи фильм алды. Ул республиканың экрандарына яңынан сығарыла.

I-се серияла (Ворошиловтың походы) Ленинградтың Ленин орденле киностудияһы—«Ленфильм» производствоһы.

Баш ролдәрҙә: Голованов, Боголюбов, Жаров, Кадачников һәм башҡалар.

Был картина тиҙ көндәрҙә «Салауат» киноһында һәм Черниковск калаһындағы клубтарҙа күрһәтеләсәк.

«Конек-Горбунок» — «Союздетфильм» производствоһы. Баш ролдәрҙә, Олейников, Ковалева, Трояновский һәм башҡалар.

Яҡын көндәрҙә Матросов исемендәге кинола һәм Черниковск калаларындағы клубтарҙа күрһәтеләсәктәр.

Редакцияның адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-46, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—88-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 01661 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
№ 72
1948 йыл
10 апрель
шәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).
Өфө ҡала Советының III сессияһы. (2-се бит).
Ярҙамсы хужалыҡтарҙа сәсеүгә әҙерлекте йылдам тамамларға. М. Потяев. — «Башнефть» берекмәһенең совхоздары һәм ярҙамсы хужалыҡтары күтәрелештә. М. Хәйҙәров. — Белоретта ашыҡ-майҙар. (2-се бит).
Ҡалир Даян.—Токарь Латышев. (2-се бит).
А. В. Стоянов. — Бойҙайҙың гектарынан 31,86-шар центнер урожай алыуға беҙ нисек өлгәштек. (3-сө бит).
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында. Ылысылыҡ алдынғыларына государство премиялары биреү тураһында. (3-сө бит).
В. Акимов. — Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң ҡулланасаҡбыҙ. (3-сө бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Социалистик ауыл хужалығы алдынғыларына дан!

Күптән түгел генә республикабыҙ ауыл хужалығы алдынғыларынан 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителгәйне. Был Указ бөтә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тарафынан ғорурлыҡ менән ҡаршыланды һәм колхоздарҙа, МТС-тарҙа, совхоздарҙа көслө хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы.

Бөгөн, газетабыҙҙың ошо номерында, тағы ла ҙур шатлыҡлы хәбәр — Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителә. Алдынғы игенселәрҙең социалистик баҫыуҙарҙа юғары урожай үҫтереү өсөн һалған көстәре юғары баһаланды. 793 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды.

Беҙҙең илдә игенсенең хеҙмәте почетлы. Элек, Бөйөк Октябрь социалистик революцияға тиклем, крәҫтиәндең тирҙәр ағыҙған хеҙмәте бер кем тарафынан да билдәләнмәне. Ул ғәйәт ауыр, һөҙөмтәле йәк ине. Капиталистик илдәрҙә ул әле лә шулай. Тик беҙҙең социалистик илебеҙҙә, колхоз хоролошо шарттарында ауыл хужалығы работниктәренең эше һәм хеҙмәте данлы, уға бер ерҙә, бер ваҡытта бирелмәгән юғары баһа бирелә. Совет крәҫтиәндәренең хеҙмәте — азат хеҙмәт. Бына шуның өсөн дә колхоз производствоһы новаторҙарының, юғары урожай мастерҙарының сафтары көндән-көн киңәйә, үҫә.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары менән ҡоралланған һәм уны үтәү өсөн туплаған республикабыҙҙың колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре үткән йыл юғары урожай өсөн көрәштә ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Тарихи ҡарар — ауыл хужалығын күтәреүҙең боевой программаһы булды. Ул бөтә игенселәрҙе яңы еңеүҙәргә дәртләндерҙе, юғары урожай өсөн киң йәйелдерелгән социалистик ярышта йәҙерләгән колхозсылар, механизаторҙар һоҡландырғыс хеҙмәт батырлыҡтары күрһәттеләр. 9,6 гектар арыштың һәр бер гектарынан 33,1 центнер урожай алған Ишмөхәмәтова звеноһының уңышы һәр кемде шатландырырлыҡ. Закирова, Кирсанов, Үҙәнбаева, Новикова иптәштәрҙең күрһәткестәре шулай уҡ социалистик игенселектең икһеҙ-сикһеҙ резервтәре һәм уларҙы файҙаланғанда ҙур майҙандарҙан юғары урожай алырға мөмкин икәнлеге тураһында һөйләйҙәр.

Алдынғы механизаторҙарҙың уңыштары ла яҡшы. Ленин ордене менән наградланған Желобецкий, Байтимиров иптәштәр үҙҙәренә тапшырылған техниканы бөтә ҡеүәтендә файҙаландылар, агротехник талаптарҙы еренә еткереп үтәү өсөн бөтә көстәрен биреп эшләнеләр һәм үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа юғары урожай алыуҙы тәьмин иттеләр.

Юғары награда менән билдәләнгән социалистик ауыл хужалығы алдынғыларының эштәре айырым звеноларҙа, бригадаларҙа һәм колхоздарҙа ғына түгел, ә барлыҡ колхоздарҙа, тотош райондарҙа һәм бөтә республикала ауыл хужалығында юғары күрһәткестәргә өлгәшергә мөмкин икәнлеге тураһында һөйләйҙәр. Миҫал өсөн Дәүләкән районын алайыҡ. Был районның колхоздары арыштан һәм бойҙайҙан урожай алыу планын 25,8 процентҡа арттырып үтәнеләр. Государство алдындағы йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп, пландан тыш бик күп иген бирҙеләр. Шундай һәм унан да ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшеү өсөн партия, совет ойошмалары, бөтә колхозсылар, механизаторҙар ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарын үтәүҙә бөтә мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланырға, совет агрономияһының өлгәшеүҙәрен ҡыйыу рәүештә колхоз производствоһына индерергә, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен практикала киң ҡулланырға тейештәр.

Награда үткәндәге хеҙмәтте билдәләү менән бергә, киләсәктә лә яҡшы эшләүҙе талап итә. Өлгәшелгәндәр менән генә тынысланыу совет кешеләренә хас түгел. 1948 йылда ауыл хужалығын күтәреү буйынса артабан тағы ла көсөркәнешлерәк эшләргә, колхоз производствоһында булған бөтә резервтәрҙе тулы файҙаланырға кәрәк. Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, ауыл хужалығы алдынғылары юғары урожай өсөн көрәштә һәр ваҡыт алдынғы сафта булырға, бөтә колхозсыларға, механизаторҙарға өлгө күрһәтергә, үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаҡлашырға һәм артта ҡалыусыларға ярҙам итергә тейештәр. Шул шарттарҙа ғына сталинсы яңы биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылында республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдында торған яуаплы бурыстар уңышлы үтәләсәк.

1948 йылда юғары урожай өсөн көрәштең яуаплы осоро — яҙ килеп етте. Хәҙер социалистик баҫыуҙарҙа ҡыҙыу эш башланасаҡ. Колхоздарҙа ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыу өсөн күп кенә ашламалар тупланды. Хәҙер уларҙы ваҡытында тулы файҙаланыу талап ителә. Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн күп кенә колхоздарҙа һәм машина-трактор станцияларында әҙерлек эштәре тамамланмаған әле. Был ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ашығыс саралар күрергә кәрәк. Һәр бер звено, бригада, колхоз, МТС баҫыу эштәренә бөтә яҡлап тулы әҙерлек менән сығырға, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үткәреүгә өлгәшергә тейеш.

Ауыл хужалығы алдынғылары — республикабыҙҙың ғорурлығы. Улар юғары урожай үҫтереү өсөн көрәштә гүзәл өлгәләр күрһәтәләр. Уларға — дан! Алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен киң ҡулланып, 1948 йылда тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшеү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәйек!

Байрам хөрмәтенә

ИШЕМБАЙ. Был көндәрҙә ҡала предприятиеларында ярыш тағы ла массовый төҫ алды. Нефть сығарыусылар, эшкәртеүселәр, энергетиктар ҙа, промартелдәр члендары ла Май байрамы хөрмәтенә алған йөкләмәләрен үтәү өсөн намыҫ менән эшләйҙәр.

Беренсе кварталь планын арттырып үтәгән беренсе промысел (директоры иптәш Славинский) коллективы апрель айының тәүге көндәрендә планын [illegible] нефть сығарҙы. Иптәш Перегудов етәкселек иткән икенсе промысел коллективы ла графиктан алда бара. Бында мастерҙар Вахитов, Давыдов иптәштәр етәкселек иткән бригадалар [illegible]. Ишембай ҡала Советы депутаттары, өлкән мастер Акмал Вахитов етәкселек иткән ер аҫты ремонты [illegible] һәр көн нормаларҙы арттырып үтәйҙәр.

Директорҙары Варшавер, Селиванов иптәштәр булған нефть эшкәртеү заводтарында, [illegible] электр станцияһында (директоры иптәш Васяев), газокомпрессор хужалығында (директоры иптәш Старков) май алды ярышында алған йөкләмәләрен үтәү өсөн айырым бригадалар, цехтар һәм күп эшселәр стахановсы вахталарҙа баҫалар.

Беренсе кварталь производство планын срогынан алда үтәгән «Өс йыл» һәм «Тайрук» промартелдәре яҙғы сәсеүгә әҙерлекте тулыһынса тамамланылар. Улар иртә культураларҙы сәсеүҙе 8—10 эш көнөндә тамамлау бурысын ҡуйҙылар.

* * *

Байкара руднигының коллективы беренсе кварталь планын срогынан алда тамамлап, Башҡортостан өлкә партия конференцияһы асылыу көнөн производство уңыштары менән билдәләгәйне. Рудник эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәре алдынғылар өлгәһенә эйәреп, апрелдә [illegible] планды срогынан 4 ай алда үтәргә һүҙ бирҙеләр.

Коллективтың май алды ярышы көндән-көн киң ҡолас ала бара.

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы

УКАЗЫ

1947 йылда колхоз мәжбүри поставкаларын һәм МТС эше өсөн натуралата түләүҙе үтәгән һәм 1948 йылға яҙғы сәсеү өсөн бөртөклө ашлыҡ культураларының орлоҡтары менән тәьмин ителгән хәлдә бойҙайҙан, арыштан һәм шәкәр сөгөлдөрөнән юғары урожай алғаны өсөн, СССР Верховный Советы Президиумының 1947 йыл 29 март Указына ярашлы рәүештә, түбәндәге кешеләрҙе ордендәр һәм медалдәр менән наградларға:

Ленин ордене менән

1. Мария Александровна Алферованы — Баймаҡ районы Каганович исемендәге колхоздың звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 31-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

2. Зайдулла Атнагол улы Атналинде — Ҡалтасы районы «Красный Танып» колхозы председателе, 43,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,4 центнер арыш урожайы алған өсөн.

3. Рәхмәй Хәсән улы Әхмәдиевте — Дәүләкән МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары, МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән өсөн, МТС тарафынан хеҙмәтләндерелгән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

4. Мизхат Ямалетдинович Байдимировты — Базан МТС-ы тракторисы, бригадала эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән өсөн, был бригада участкаһында 183 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,07-шәр центнер арыш урожайы алынды.

5. Василий Федорович Барабановты — Дәүләкән районы «Победа» колхозы председателе, 43,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,7-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

6. Алексей Андреевич Бочкаревты — Бөрө районы Берия исемендәге колхоз председателе, 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,17-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

7. Михаил Андреевич Букинде — Дәүләкән МТС-ы комбайнеры, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

8. Василий Николаевич Воронинде — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының бригадиры, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

9. Павел Федорович Гавриловты — Дәүләкән МТС-ы слесаре, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

10. Зоя Михайловна Головинаны — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,5-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

11. Федор Николаевич Головинде — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозы председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,4-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

12. Егор Владимирович Горловты — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозы бригадиры, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,6-шар центнер арыш урожайы алған өсөн.

13. Григорий Иванович Демченконы — Дәүләкән МТС-ының участка агрономы, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

14. Федор Семенович Десятниковты — Бөрө районы Берия исемендәге колхоздың бригадиры, 22 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,5-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

15. Наталья Мефодиевна Дьяконованы — Бөрө районы Горький исемендәге колхоздың звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 27-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

16. Виктор Михайлович Желобецкийҙе — Дәүләкән МТС-ы механиге, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

17. Мәдинә Закир ҡыҙы Закированы — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,9-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

18. Виктор Григорьевич Зоринде — Мишкә районы «III Интернационал» колхозы председателе, 41,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

19. Мария Степановна Ивушкинаны — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,44-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

20. Пелагея Степановна Исачкинаны — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының звеноводы, 12 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,35-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

21. Гумар Абдуллаган улы Исчуринде — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенолағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алынды.

22. Сания Мәннән ҡыҙы Ишмөхәмәтованы — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының звеноводы, 9,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 33,1-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

23. Емельян Петрович Кирсановты — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,6-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

24. Анна Ивановна Короткованы — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

25. Павел Петрович Левинде — Дәүләкән МТС-ы слесаре, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

26. Леонид Алексеевич Леонтьевте — Базан МТС-ы директоры, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

27. Афанасий Самойлович Малукаловты — Дәүләкән районы «1 Май» колхозы председателе, 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

28. Антип Федорович Масленниковты — ВКП(б)-ның Дәүләкән район комитеты секретаре, үҙенең эше менән район буйынса тотош бойҙайҙан һәм арыштан урожай йыйнау планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

29. Алексей Мефодьевич Могилевты — Дәүләкән районы «Победа» колхозының бригадиры, 25,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,03-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

30. Гаврил Игнатьевич Новиковты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының бригадиры, 25 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,5-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

31. Елена Ивановна Новикованы — Маҡар районы «Восток» колхозының звеноводы, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,92-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

32. Маркел Архипович Овчаровты — Аслыкүл МТС-ы трактор бригадаһы бригадиры, 150 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,1-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

33. Вера Владимировна Перечнаяны—Дәүләкән районы «1 Май» колхозының колхозсыһы, бригадала эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы алынды.

34. Федор Афанасьевич Рябухинде — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының бригадиры, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

35. Федот Фролович Самойловты — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы председателе, 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26-шар центнер арыш урожайы алған өсөн.

36. Николай Акимович Сергеевте — Дәүләкән МТС-ының участка механиге, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

37. Сергей Павлович Сидренконы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының бригадиры, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

38. Александр Павлович Смертинде — Дәүләкән район башҡарма комитетының председателе, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай йыйнау планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

39. Прасковья Тимофеевна Стахакованы—Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының звеноводы, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

40. Тимер Булат улы Терегуловты—Дәүләкән районы район ауыл хужалығы бүлеге мөдире, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай йыйнау планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

41. Никита Парфенович Тимофеевте — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

42. Иван Кириллович Тутынинде — Дәүләкән МТС-ы комбайнеры, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәште, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынды.

43. Нурия Сәтдиҡ ҡыҙы Үҙәнбаеваны — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

44. Фәтхислам Әхмәтғәли улы Үҙәнбаевты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенолағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алынды.

45. Андрей Семенович Чередниченконы—Дәүләкән районы «Горный труд» колхозы председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,37-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

46. Ефим Иванович Черненконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың бригадиры, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

47. Василий Константинович Чумаковты—Маҡар районы «Восток» колхозының бригадиры, 28 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,89-ар центнер арыш урожайы алған өсөн.

48. Мария Степановна Чумакованы — Маҡар районы «Восток» колхозының звеноводы, 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,85-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

49. Василий Ефремович Шекачевты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының звеноводы, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,97-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордене менән

1. Ғабдрахман Мөхәмәтғәли улы Абдуллинде — Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозы бригадиры, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,97 центнер арыш урожайы алған өсөн.

2. Дмитрий Иванович Авдеевте —Дәүләкән МТС-ының баш бухгалтеры, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53 центнер арыш урожайы алынған.

3. Фәкиһә Дәүләтхан ҡыҙы Адиеваны — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,29 центнер арыш урожайы алған өсөн.

4. Елизавета Степановна Александрованы — Базан МТС-ы тракторисҡаһы, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2 центнер арыш урожайы алынған.

5. Борис Григорьевич Алексеевте — Дәүләкән МТС-ының слесаре, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53 центнер арыш урожайы алынған.

6. Степан Тимофеевич Алексеевте — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,37 центнер арыш урожайы алынған.

7. Микиша Антриевич Антриевте — Ҡалтасы районы «Красный Танып» колхозының бригадиры, 21,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,22 центнер арыш урожайы алған өсөн.

8. Анна Ивановна Асееваны — Дәүләкән районы «1 Май» колхозының колхозсыһы, ул бригада эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86 центнер бойҙай урожайы алынған.

9. Анна Петровна Асееваны — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86 центнер бойҙай урожайы алынған.

10. Варвара Федоровна Асееваны — Дәүләкән районы «1 май» колхозы колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригаданың участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,36 центнер бойҙай урожайы алынған.

11. Василий Григорьевич Асеевте — Дәүләкән районы «1 май» колхозы колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26 центнер бойҙай урожайы алынған.

12. Мырҙа Әхмәт улы Әсфандеяровты — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың бригадиры, 43 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,3 центнер арыш урожайы алған өсөн.

13. Ғәбделхәй Фазулла улы Әхмәтовты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1 центнер арыш урожайы алынған.

14. Хәбиб Хәлфетдин улы Әхмәтовты—Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың бригадиры, 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 20 центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

(Дауамы бар).

Өфө кала Советының III сессияһы

ЯРҘАМСЫ ХУЖАЛЫКТАРҘА СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛЕКТЕ ЙЫЛДАМ ТАМАМЛАРҒА

„Башнефть“ берекмәһенең совхоздары һәм ярҙамсы хужалыктары күтәрелештә

Берекмәнең совхоздары һәм ярҙамсы хужалыктары коллективтәре һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы карарын тормошка ашырыу өсөн көрәшеп, үткән йылда үҙ хужалыктарынан юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Бөтәһе 985 гектар сәсеүлек майҙанының һәр гектарынан 16-шар центнер, ә 6-сы номерлы совхозда 180 гектар майҙандың һәр гектарынан уртаса 18,2-шәр центнер урожай алынды. Картуф буйынса урожай тағы ла юғарырак булды.

Совхоздар һәм ярҙамсы хужалыктар һуңғы биш йыл эсендә беренсе булярак үткән йылда бесән әҙерләү планын арттырып үтәнеләр, малдарҙы концентрат аҙыктар менән тулыһынса тәьмин иттеләр. Бигерәк тә мөгеҙлө эре малдар, сускалар үрсетеү пландарының арттырып үтәлеүе, малдарҙың продукт биреүсәнлегенең күтәрелеүе эшселәр тәьминатен яхшыртыуҙа ҙур роль уйнаны. Тик бер йыл эсендә генә нефтселәрҙең эшселәр тәьминатенә 4553 центнер һөт тапшырылды.

Коллективтәр араһында социалистик ярышты киң ойоштороу алынған йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәүгә мөмкинлек тыуҙырҙы. Ошолар һөҙөмтәһендә лә «Башнефть» берекмәһенең бөтә совхоздары һәм ярҙамсы хужалыктары рентабелле хужалыкка әйерелделәр һәм бер йылда 654 мең һум файҙа бирҙеләр. «1 Май» совхозының (директоры иптәш Житин) һәм «Туймазынефть» тресының Ютазы совхозының (директоры иптәш Ғумеров) күрһәткестәре айырыуса якшы.

Нефтселәрҙең совхоздары һәм ярҙамсы хужалыктары һуғыштан һуңғы биш йыллыктың өсөнсө йылы яҙғы сәсеүенә лә уңышлы рәүештә әҙерләнәләр. Яҙғы сәсеүгә талап ителгән орлоҡ тулыһынса әҙер. Уларҙың сығышы тикшерелгән. Тракторҙар, тағылма инвентарҙар (сәскес, һабан, культиваторҙар) ремонтланып бөттө. Көҙҙән туңға һөрөп калдырылған ерҙәргә меңдәрсә тонна тиреҫ ашламалары сығарылды. Былардан тыш совхоздарға дүрт вагон минераль ашламалар ташып куйылды. Хәҙерге көндә йәшелсә парниктәрендә кыҙыу эш йәйелдерелә.

Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең ҙур хәстәрлеге арҡаһында совхоздарҙың производство һәм торлак төҙөлөшөнә һуңғы ике йыл эсендә ике миллион һумдан артык средство файҙаланылды. Бөтә совхоздар ҙа электрләштерелгәндәр. «1 Май» совхозында 100 киловатт көүәтлелегендә электр станцияһы төҙөлөп, унда бөтә производство эштәре (тирмән, такта ярыу, силос кыркыу, орлоктарҙы таҙартыу һәм башкалар) электр көсө ярҙамында башкарыла.

Башкортостан нефтселәре, үткән йылда нефть сығарыу планын срогынан алда тамамлап, илебеҙгә пландан тыш меңдәрсә тонна нефть бирҙеләр. Улар быйыл тағы ла якшырак күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәләр. Илебеҙгә күберәк нефть биреү өсөн көрәшеүсе нефтсе эшселәрҙең материаль-тормош кимәлен күтәреүгә булышлык итеүгә саҡырылған «Башнефть» берекмәһе совхоздарының һәм ярҙамсы хужалыктарының коллективтары үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре менән ошо бөйөк эшкә намыҫлы вкладтарын индерәләр.

М. Потлев.

«Башнефттең» эшселәр тәьминәте управлениеһының бүлек начальнигы.

Өлгөлө әҙерлек

Өфө һал ағыҙыу транспорт конторайының ярҙамсы хужалығы йылдан-йыл нығый һәм үҫә бара. Үткән йылда ярҙамсы хужалыктың сәсеү майҙаны 24 гектар тәшкил итте. Ерҙе якшы эшкәртеү һәм сәсеүлектәрҙе үҙ вакытында тәрбиәләү арҡаһында юғары урожай алыуға өлгәшелде. Бөтә сәсеү майҙанынан 5 тонна бөртөклө ашлык, 35,6 тонна картуф, 4,5 тонна турнепс, 6 тонна йәшелсә һәм 800 килограмм помидор алынды. Был, общественный туклаһыуға етерлек күләмдә йәшелсә, борсак бүлергә һәм бер өлөшөн эшселәргә арзан хак менән һатырға мөмкинлек бирҙе.

Ярҙамсы хужалыктың биш баш мөгөҙлө эре малы, 7 аты һәм сускалары бар. Малдар кышлыкка етерлек күләмдә аҙык менән тәьмин ителгәйне. Малсылыктан 300 килограмдан артык ит, 4 мең литрҙан артык һөт алынды. Государство алдындағы бөтә төр йөкләмәләр ҙә үҙ вакытында үтәлде. Хужалык үткән йылда 15 мең һум самаһы файҙа алды.

Алда перспектива тағы ла ҙурырак. Ағымдағы йылда сәсеү майҙаны 25 гектарға етәсәк. Шуның ун гектарына бөртөклө ашлык, ун гектарына картуф, алты гектарына йәшелсә сәселә. Сәсеүгә бөтә орлоктар ҙа әҙер, ауыл хужалығы инвентарҙары ремонтланған, яғыулык материалдары ташып куйылған.

Агротехник саралар үткәреүгә лә серьез иғтибар бирелде. Баҫыуға 72 тонна тиреҫ сығарылды, 6 тонна көл әҙерләнде. Үткән йылға карағанда быйыл күбеһенсә сортлы орлоктар сәселәсәк. Мәҫәлән, юғары урожай биреүсе һәм кыш һаклау өсөн уңайлы булған «Рябиновка» сортлы 8 тонна картуф ултыртыу планлаштырылды.

В. Андреев.

Белореттә ашыкмайҙар

Үткән йылда Белорет заводтарының ярҙамсы хужалыктары сәсеүлектәрҙе үҙ вакытында тәрбиәләмәү арҡаһында түбән урожай алдылар. Хужалык эштәрен башкарыуға йөҙҙәрсә мең һумдан артык акса тотоп, ҙур зыян күрҙеләр. Ярҙамсы хужалыктарҙа бындай хужаһыҙлык практикаһы был һаман киң урын алып килә. Сөнки заводтарҙың хужалык етәкселәре лә, шулай ук ундағы партия һәм профсоюз ойошмалары ла эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең тәьминатен якшыртыуҙа өҫтәмә сығанак булған был әһәмиәтле эш тармағына тейешле иғтибар бирмәйҙәр, уларҙы рентабелле хужалыкка әйләндереү өсөн эшлекле сара күрмәйҙәр.

Яҙғы сәсеүгә әҙерлектең хәл иткес көндәре етте. Ә каланың ике эре ярҙамсы хужалыктары сәсеүгә әҙерлектә ашыкмайҙар. Металлургия комбинаты менән Корос-сыбык заводы быйыл 3200 гектар майҙанда сәсеү үткәрергә тейеш. Ләкин был ике хужалыктың береһендә лә сәсеү орлоғо етерлек туплалмаған. Металлургия комбинатының 300 тонна бөртөклө ашлык орлоғо сәсергә бөтөнләй яраксыҙ түгел. Корос-сыбык заводында 107 тонна бөртөклө ашлык орлоғон алыштырыу талап ителә. Шулай ҙа ОРС етәкселәре Вескер һәм Степанов иптәштәр уларҙы кондицияла орлоктарға алыштырыуҙы йылдам хәл итеү сараһын күрмәйҙәр.

Бөртөклө ашлык культуралары орлоғонан тыш, ошо ике ярҙамсы хужалыкта планда каралған 200 гектар йәшелсә сәсеүлеге өсөн дә орлоктар етешмәй.

Ауыл хужалығы инвентарҙарын әҙерләү буйынса ла эш шундай ук хәлдә тора. Корос-сыбык заводында яҙғы сәсеүҙә эшләйәсәк 12 тракторҙың бөгөнгө көндә тик алтыһы ғына ремонттан сығарылды һәм уларҙың да өсәһе генә тикшереп каралды. Бында тракторҙа эшләү өсөн 7 тракторист етешмәй.

Һәр ике хужалыктың да төп эш базаларына бер килограмм да яғыулык ташылмаған. Тракторҙарға тағылма инвентарҙар, башка ярҙамсы инвентарҙар ҙа әҙер түгел.

Сәсеү башланыуға һанаулы ғына көндәр калыуға карамаҫтан, нығытып эшләнгән производство пландары юк. Корос-сыбык заводы хужалығының агрономы иптәш Стрельченко: «Беҙҙә сәсеү эштәре дөрөҫ план менән үткәреләсәк», — тиһә лә, производство планы дөйөм рәүештә генә төҙөлгән. Унда айырым звеноларҙың роле, уларҙың производство үҙсәнлектәре иҫәпкә алынмаған. План бригадаларға, звеноларға ошо көнгә тиклем еткерелмәгән.

Был заводтарҙың ярҙамсы хужалыктарында йөҙҙәрсә кеше эшләй. Тик комбинат хужалығында ғына 700-ҙән артык эшсе иҫәпләнә. Ләкин ошо ҙур кеш—эшселәр араһында яҙғы сәсеүгә әҙерлек буйынса массовый-политик эш киң рәүештә ойошторолоп ебәрелмәгән.

Был серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм яҙғы сәсеүгә ярҙамсы хужалыктарҙы тулы әҙерлек хәленә килтереү өсөн йылдам һәм эшлекле саралар күрелергә тейеш.

М. Хәйҙәров.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Иғтибарҙан ситтә калдырылған тармак

Леспромхозларҙың ярҙамсы хужалыктарында яҙғы сәсеүгә әҙерлек һис тә канәғәтләнерлек түгел. Бигерәк тә орлок туплау мәсьәләһе насар тора. Әҙерләнгән һоло орлоғоноң сығышы түбән, уның күбеһе яракһыҙ. Бер йыллык һәм күп йыллык үлән орлоктары бөтөнләй юк тип әйтерлек.

Агротехник сараларҙы үткәреү ҙә ҙур өҙәклек менән алып барыла. Баҫыуҙарға 1200 урынына бары 170 тонна ғына тиреҫ сығарылған һәм 9 тонна ғына көл йыйналған. Баҫыу эшенә талап ителгән инвентарҙарҙың — һабан һәм сәскестәрҙең дә бары 50 проценте самаһы ғына ремонтланган.

Өфө һәм Стәрлетамак такта ярыу заводтарының ярҙамсы хужалыктарында иртә өлгөрә торған йәшелсәләрҙе үҫтереү өсөн теплицалар төҙөү билдәләнгәйне. Кыҙғанысҡа карышы, уларҙы төҙөү эшенә һаман да башланылғаны юк әле. Шулай ук парник рамаларын ремонтлау эше бик һүлпән бара. 150 дана парник рамаһынан бары 33-өнә генә ремонт үткәрелгән һәм бында куйылған.

Сортлы орлоктарҙы кулланыу урожайҙы күтәреүҙә ҙур әһәмиәткә эйә булыуы һәр кемгә билдәле. Ләкин был мәсьәләгә леспромхоздарҙың ярҙамсы хужалыктарында тейешенсә иғтибар бирмәйҙәр. Бөтә леспромхоздар буйынса сортлы орлоктар менән 10 гектар ғына майҙанды сәсеү планлаштырылыуы быны үҙе үк дөрөҫләп тора.

Бөтә был етешһеҙлектәр леспромхоз етәкселәренең үҙ предприятиеларендәге ярҙамсы хужалыктар эшенә етерлек иғтибар бирмәүҙәренән, уларҙы нығытыу һәм доходлы хужалыкка әйләндереү өсөн конкрет саралар күрмәүҙәренән килә. Башкортостан урман промышленносе Министерствоһы үҙе лә ярҙамсы хужалыктарҙың эшмәкәрлегенә тығылмаусылык позицияһында тора. Был эш менән туранан-тура етәкселек итергә тейеш булған агроном иптәш Огородников йәнле бәйләнеш тотмай һәм хужалыктарға талап ителгән ярҙамды күрһәтмәй.

А. Овечкин.

Токарь Латышев

Беҙ механик цехка индек. Цех корпусы ҙур, бейек һәм якты. Оҙон корпуста өс рәт булып теҙелеп киткән токарный станоктар бөтәһе лә ритмлы хәрәкәттә инеләр. Станок янындағы һәр бер токарь үҙ эше менән мәшғүл ине. Ҙур универсаль станокта эшләүсе, оҙон, нык кәүҙәле бер токарь янына барҙык.

— Беҙҙең Латышев тигән токаребеҙ бына ошо инде, — тине партбюро секретаре иптәш Алексеенко.

Сталин исемендәге ошо заводта ул бер өҙлөкһөҙ 22 йыл эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында иң яуаплы эштәр башкарҙы. Ул ошо йылдар эсендә аксалата ун тапкыр бүләкләнде һәм ун ике тапкыр благодарность алды.

Алексеенконың һүҙен гудок тауышы бүлде. Ул урынынан торол:

— Бер генә минутка, — тине лә ишекте асып: — токарь Латышевте саҡырығыҙ, минең янға инеп сыкһын, — тине.

— Беҙҙең эш арыта торған эш түгел бит ул, — тине йылмайып.

— Нисек?

— Шулай. Мин үҙем эштә арыу һиҙгәнем юк, киреһенсә, эшләмәгән сакта арыйым.

Алексеенко гәзәтенсә якшы күңел менән йылмайып:

— Һуғыш вакытында цехтан кайтмай эшләй торғайның, ул вакытта бер аҙ арығанлык һиҙелгәндер инде, — тине.

...ҙә эшләнеләр һәм ҙур мохтажлык менән көн иттеләр. Иртә үлеүҙәренең сәбәбе, әлбиттә, шул булған. Ул вакытта хеҙмәт хәҙерге кеүек ләззәт түгел, ә ғазап булған.

— Алдағы айҙарға ниндәй йөкләмәләр алғанһығыҙ?

— Мин 1948 йылда һәр айҙағы нормамды ике йөҙ процентҡа арттырып үтәйәсәкмен. Быға ышанам һәм үтәрмен, — тине Латышев.

Телефон шылтыраны. Алексеенко телефонды алып:

— Эйе, бында ул, әйтермен, — тип, трубканы куйҙы һәм Латышевка карап:

Бойҙайҙың гектарынан 31,86-шар центнер урожай алыуға беҙ нисек өлгәштек

Социалистик Хеҙмәт Геройы Александр Васильевич СТОЯНОВ

Дәүләкән районының «1 Мая» колхозы баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры

БРИГАДИР — КОЛХОЗДА ҮҘӘК ФИГУРА

Бала саҡта уҡ мин колхозда эшләнем. Бөтә тормошом колхоз менән бәйләнгән. Һуғышҡа тиклем ла, сәсеүсе ла, тракторсы ла булдым. Совет Армияһында тағы ла бер һөнәргә — тимерселеккә өйрәндем. Был тәжрибәләр минең бригадирлек эшемә ныҡлы ярҙам итте.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғас, демобилизацияланып тыуған ауылға ҡайтыу менән колхоз правлениеһы һәм партия ойошмаһы миңә яуаплы эшкә — баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры итеп ҡуйҙылар. [illegible]

[illegible]

АГРОТЕХНИКАҒА ТАЯНЫП

[illegible]

[illegible] кистәк биреп ҡуям. Иртә менән бөтә колхозсылар үҙ участкаларына эшкә китәләр. Уларға хеҙмәт көнөн звеновод менән бергә иҫәпләйем. Әгәр ҙә бригада члены башаҡ йыйнауҙа Һәки япраҡ әҙерләүҙә 0,05 хеҙмәт көнө генә эшләһә лә, мин уны кнәгәгә яҙып ҡуям. Звеноводтарға, уларҙың етәкселек эше өсөн, звено члендары тарафынан бер көндә эшләнгән хеҙмәт көнөнөң 2 проценте миҡдарында хеҙмәт көнө яҙам. Звеноводтар — эшкә етәкселек итеүҙә минең ныҡлы терәгем.

Бригаданың эше алдан төҙөлгән план буйынса бара. Уны беҙ колхоздың производство планы нигеҙендә төҙөйбеҙ.

Үҙған йылда беҙҙең бригада 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы үҫтерҙе. СССР Верховный Советы Президиумы быны өсөн миңә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе. Күрәһегеҙ, минең эшемдә айырым сер юҡ. Бындай урожайҙы һәр бер баҫыусылыҡ бригадаһы үҫтерә ала. Тик алдынғы ауыл хужалығы фәне менән ныҡ дуҫлашырға, юғары урожай мастерҙары тәжрибәһен киң ҡулланырға ғына кәрәк.

Беҙҙең бригада 1948 йылда 30 гектар майҙандың һәр гектарында 190-шар бот урожай үҫтерергә һүҙ бирҙе.

Беҙ үҙ һүҙебеҙҙе үтәү өсөн бөтә көсөбөҙҙө һалырбыҙ.

БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ

Йылҡысылыҡ алдынғыларына государство премиялары биреү тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы республикабыҙҙың колхоздарында малсылыҡ үҫтереү буйынса 1947 йылғы социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡараны. Йылҡысылыҡ буйынса иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн БАССР Министрҙәр Советы дипломдарын һәм 1000 һум күләмендә государство премияларын түбәндәге колхоз председателдәренә, йылҡысылыҡ фермалары мөдирҙәренә бирергә ҡарар итте.

ТУЙМАЗЫ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Әғзам Хәлил улы Хәлиловҡа — «Булаҡ тау» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 104 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 147,6 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Хажи Төхбәт улы Төхбәтовҡа — «Шишмә» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 100 процентҡа үтәгәне өсөн.

БЛАГОВЕЩЕН РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Поликарп Никитович Нягановҡа — «Звезда» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 120 процентҡа үтәгәне өсөн.

ЯҢАУЫЛ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Ғәлиулла Ишкәй улы Ишкәевкә—«Яхе» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 109,3 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 275 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Байморза Батырша улы Батыршингә — Каганович исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 112,2 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 166,6 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Паки Байғужа улы Байғужингә — Чкалов исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 106,4 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 153 процентҡа үтәгәне өсөн.

ДЫУАН РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Иван Федорович Кичигингә—«Новая жизнь» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 123 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Николай Михайлович Белобородовҡа — «Победа» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 112 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Яков Иосифович Болдингә — «Коминтерн» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 101,9 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 110,7 процентҡа үтәгәне өсөн.

ИГЛИН РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Егор Яковлевич Петровҡа — Куйбышев исемендәге колхоздың йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102,2 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 133,3 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Григорий Васильевич Седовҡа — «Красный Октябрь» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 101,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 160 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Роман Константинович Смирновҡа — «Бривайс-арайс» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 113,6 процентҡа үтәгәне өсөн.

ӘЛШӘЙ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Гаврил Максимович Яхногаҡа — Шевченко исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 171 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Яппар Хәбир улы Хәбировҡа — «Таң күл» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 116,2 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 157 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Яков Андреевич Коршиковҡа — Чкалов исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 104,4 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 250 процентҡа үтәгәне өсөн.

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Әхмәт Юныс улы Мурапшинҡа — «Коммунар» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 120 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Герасим Андреевич Зайцевҡа — Чапаев исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 101,4 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 116,6 процентҡа үтәгәне өсөн.

БАҠАЛЫ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Сергей Данилович Царьковҡа —«Ленинский путь» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 106 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 144,4 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Андрей Павлович Соловьевҡа —Жуков исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 116 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 200 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Гермоген Никитович Алгиновҡа — «Новый завод» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 104,5 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 136,3 процентҡа үтәгәне өсөн.

БҮЗДӘК РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Сафа Садри улы Басировҡа — «Игенсе» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108,3 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 150 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Шәрәфетдин Шаһиғәли улы Байковҡа — «Сулпан» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 113 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 133,3 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Исмәғил Инһажетдин улы Әсәдуллингә — «Октябрь» колхозы йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 115 процентҡа үтәгәне өсөн.

ТӘТЕШЛЕ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Константин Парфилович Ҡарлышевҡа—«Красная звезда» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 132 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 220 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Фәтих Ғабдрахман улы Ғабдрахмановҡа—«Шишмә тау» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 105 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 300 процентҡа үтәгәне өсөн.

СТӘРЛЕБАШ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Павел Игнатьевич Беловҡа—Матросов исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 100 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Шаһи Хәжиәхмәт улы Шәриповҡа—«Мәҙәниәт» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 112,8 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 100 процентҡа үтәгәне өсөн.

СТӘРЛЕТАМАҠ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Петр Леонтьевич Устиновҡа — «Юпитер» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 121,7 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 200 процентҡа үтәгәне өсөн.

БӘЛӘБӘЙ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Алексей Федорович Сотниковҡа — «III Интернационал» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 115,7 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 200 процентҡа үтәгәне өсөн.

БОРАЙ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Иҙиәт Ғиниулла улы Ғәтиәтовҡа—«Шишмә баш» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 110,2 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 166 процентҡа үтәгәне өсөн.

ПОКРОВКА РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Василий Александрович Баженовҡа — «Красная пристань» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 112 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 133 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Николай Васильевич Сулимовҡа—Крупская исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108,3 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 166 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Ислам Дәүләтбай улы Дәүләтбаевҡа — Энгельс исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 110,3 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 180 процентҡа үтәгәне өсөн.

БОЗАЯЗ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Әхтәм Латип улы Ғүмәровҡа — «Яңы буйлаҡ» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102,5 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 150 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Хабир Кабир улы Ҡанбековҡа — «Марс» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 200 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Григорий Сергеевич Грачевҡа — Ворошилов исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 109 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 171,4 процентҡа үтәгәне өсөн.

НУРИМАН РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Модест Николаевич Цепелевҡа — «Победа» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 117,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 100 процентҡа үтәгәне өсөн.

ҠАРИҘЕЛ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Ефим Иванович Коряковҡа—Стаханов исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 105,5 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 116,6 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Аркадий Дмитриевич Булатовҡа — «Победитель» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 103,5 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 133,3 процентҡа үтәгәне өсөн.

УЧАЛЫ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Мортаза Алтын улы Алтыновҡа — «Өргөн» колхозы йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 107,7 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 177,2 процентҡа үтәгәне өсөн.

САЛАУАТ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Мәғсум Ғәзим улы Хәжингә — «Әй» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 119,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 212,2 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Рәхимйән Гуфран улы Гуфрановҡа — «Нур» колхозы йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 114 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 153,8 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Зиннәтулла Лотфулла улы Лотфуллингә—Хамматов исемендәге колхоз йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 109 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 220 процентҡа үтәгәне өсөн.

ЙӘРМӘКӘЙ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Емельян Михайлович Спирингә — Пугачев исемендәге колхоз йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108,5 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 187,5 процентҡа үтәгәне өсөн.

ДӘҮЛӘКӘН РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Федор Фролович Самойловҡа—«Новый быт» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 102,7 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 131,2 процентҡа үтәгәне өсөн.

2. Хәлиулла Ҡунаҡбай улы Хәмитовҡа — Салауат исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 110,6 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 180 процентҡа үтәгәне өсөн.

ИЛЕШ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Сәмиғулла Әнәдулла улы Рәхмәтуллингә — «Сүҙәм» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 161,1 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Мөхәммәт Халиҡ улы Халиковҡа — «Коммунар» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 110,9 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 166 процентҡа үтәгәне өсөн.
3. Григорий Андреевич Третьяковҡа — Чеверев исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 108 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 175 процентҡа үтәгәне өсөн.

ШИШМӘ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

Миниәхмәт Фәтхулла улы Кираевҡа — Буденный исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 104 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 100 процентҡа үтәгәне өсөн.

ҠАЛТАСЫ РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Кәли Мөхәммәт улы Мөхәмматовҡа — «Ҡыҙыл таңың» колхозы йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 107,8 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 150 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Байрам Ямит улы Ямитовҡа — «Вперед» колхозы йылҡысылыҡ фермаһы мөдиренә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 111 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 115,3 процентҡа үтәгәне өсөн.

ҠАНДРА РАЙОНЫ БУЙЫНСА:

1. Әхмәди Хисаметдин улы Мәхәмәтовҡа—«Ҡыҙыл йондоҙ» колхозы председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 107,1 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 137,5 процентҡа үтәгәне өсөн.
2. Нурлыгаян Фәттәх улы Әмиевкә — Чапаев исемендәге колхоз председателенә, йылҡысылыҡ үҫтереү планын 114,2 процентҡа, ҡолондар үҫтереү планын 200 процентҡа үтәгәне өсөн.

Өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң ҡулланасаҡбыҙ

Үҙған йыл беҙҙең районда алдынғы колхоздары уңым сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә ныҡлы иғтибар биреү, яҙ өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу үткәреү һөҙөмтәһендә арыштан юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Мәҫәлән, «Грем-ключ» колхозы 41 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 25,5-әр центнер, «Труженник» колхозы 40 гектар майҙанда 25,75-әр центнер, «Ярыш» колхозы шундай уҡ майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 22-шәр центнер урожай алды.

Был колхоздар ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫ саҡта һәр бер гектарға 5—6 тонна иҫәбенән уңым сәсеүлектәрен тиреҫ шыйыҡсаһы менән аҙыҡландырҙылар һәм бөтә сәсеүлектәрҙе лә тырматтылар. Колхозсылар быйыл тағы ла ҙурыраҡ майҙанда өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрергә әҙерләнәләр. 5000 гектар майҙанда уңымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәреләсәк.

«Красная заря» ауыл хужалығы артеле члендары быйыл 120 гектар майҙанда, Ворошилов исемендәге колхоз 30 гектар, «Индустрия» һәм «Еңлек» колхоздары 25-әр гектар майҙанда уңым сәсеүлектәрен аҙыҡландырырға планлаштырҙылар. Звенолар быны өсөн етерлек ашламалар, инвентарҙар әҙерләнеләр.

Сәсеүлектәрҙе аҙыҡландырыуҙы беҙ мөмкин тиклем иртәрәк, ҡар иреп бөтөр-бөтмәҫ саҡта уҡ үткәрәсәкбеҙ. Был ваҡытта ашламаларҙың үҫемлектәргә булған файҙаһы ла күберәк буласаҡ һәм баҫыу эштәрен дә еңеләйтәсәк.

В. Акимов,
Илеш районы ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы.

МЕХАНИЗАТОР КАДРҘАР

ДӘҮЛӘКӘН. Механизаторҙар мәктәбендә өс группа трактористар, өс группа комбайнерҙар уҡый. Ошо көндәрҙә мәктәп 28 тракторист әҙерләп сығарҙы. Шуларҙың 26-һына «СТЗ—НАТИ» тракторында эшләү хоҡуғы бирелде. Гвоздецкий, Исаев, Нилов, Печов, Сергеев һәм Шведов иптәштәр экзамендарҙы тик отлично билдәһенә генә тапшырҙылар.

Быйыл мәктәп республиканың МТС һәм совхоздарына 200-ҙән артыҡ механизатор кадрҙар әҙерләп сығарасаҡ.

Трактористәр ярышы

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү айҡанлы районың механизаторҙары араһында ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙы.

Үҙған йыл трактористәр ярышында районда беренсе урынды алған Учалы МТС-ының Алсын Дәүләтбаев етәкселек иткән трактор бригадаһы быйыл да ярышҡа беренсе булып ҡушылды. Иптәш Дәүләтбаев шартлы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртеү, үҙе эшкәрткән участкала һәр бер гектарҙан уртаса 15-әр центнер, ә 25 гектар майҙанда һәр бер гектарҙан 25-әр центнер урожай алыуға һүҙ биреп, районың бөтә механизаторҙарын ярышҡа саҡырҙы.

Ошо уҡ МТС-тың трактор бригадаһы бригадиры, коммунист иптәш Әхмәтшин СССР Верховный Советы Президиумы Указына яуап итеп, үҙ теләге менән районындағы иң артта барыусы «Иманғол» колхозын хеҙмәтләндерергә йөкләмә алды.

Байрамғол МТС-ының алдынғы комбайнеры Бәйгускаров сәсеү осоронда трактор бригадаһы менән етәкселек итергә, «Яңы юл» колхозын хеҙмәтләндерергә һүҙ бирҙе.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Германияның Совет зонаһы һәм көнсығыш зоналары араһында транспорт йөрөшөнә контролде яҡшыртыу

БЕРЛИН, 4 апрель. (ТАСС). Билдәле булғанынса, АҠШ, Англия һәм Францияның Берлиндәге хәрби администрацияларының Германияның көнбайыш оккупацион зоналары менән бәйләнешен тәьмин итеү өсөн совет властәре үҙ ваҡытында Берлин һәм көнбайыш зоналар араһында совет оккупацияһы зонаһы территорияһы аша үтә торған билдәле юлдар буйынса поездар, автомобилдәр һәм самолеттар йөрөтөргә рөхсәт иткәйнеләр. Шуның менән бергә, Берлин һәм көнбайыш зоналар араһындағы коммуникацияларҙа, шулай уҡ көнбайыш зоналар һәм совет оккупацияһы зонаһы араһындағы коммуникацияларҙа тәртип һаҡлау эшен совет хәрби властәре тормошҡа ашырырға тейеш инеләр.

Ләкин һуңғы ваҡыттарҙа Бизонияла аслыҡ булыу айҡанлы аслыҡтан интегеүсе кешеләрҙең көнбайыш зоналарҙан демаркацион һыҙыҡ аша, йәшерен рәүештә, совет зонаһына күсеүҙәре ныҡ артты, аҙ яҡынлашыу менән ул массовый характер алды. Меңәрләгән немец кешеләре икмәк һәм эш табыуға ышанып, көн һайын совет зонаһына күсәләр. Кешеләрҙең көнбайыш зоналарҙан стихиялы рәүештә совет зонаһына күсеүҙәре шундай ҙур күләмгә барып етте, был совет зонаһы кешеләрен аҙыҡ менән нормаль тәьмин итеүгә ҡурҡыныс тыуҙыра башланы. Бынан тыш, демаркацион һыҙыҡта контроль булмауынан файҙаланып, спекулянттар, бандиттар, шпиондар һәм башҡа енәйәтсел элементтәр совет зонаһына үттеләр. Улар бында енәйәттәр эшләнеләр һәм, күп кенә ваҡиғаларҙа, совет оккупацияһы зонаһында немец халҡы тарафынан тормошҡа ашырыла торған демократик ҡоролошто нығытыу буйынса сараларға ҡаршы эш алып барҙылар. Зонаның демократик общественносе матбуғат, йыйылыштар һәм ландтагтар аша тейешле немец властәренән зонала тәртип һәм общественный тынысылыҡты урынлаштырыу буйынса, шулай уҡ совет зонаһы халҡын аҙыҡ-түлек менән нормаль рәүештә тәьмин итеү өсөн саралар күреүҙе көсәйтеүҙе гәзел рәүештә талап итте.

Америка һәм Британия властәре контроль механизмы тураһындағы килешеүҙе боҙғас һәм контроль советы властең верховный органы булыуы яғынан аҡрынлап юҡ ителгәс, шулай уҡ совет һәм көнбайыш оккупацияһы зоналары араһындағы демаркацион һыҙыҡтағы һәм коммуникацияларҙағы тәртипте тупаҫ рәүештә боҙоу ваҡиғалары булды. Контроль советенең эшен өҙөп, Америка, Британия һәм Франция зоналарының оккупацион властәре был властәрҙең үҙ өҫтәренә алған йөкләмәләре менән уртаҡ бер генә нәмәһе лә булмаған бер яҡлы сепаратный хәрәкәттәр эшләй башланылар.

Америка, Британия һәм Франция гәзеталары, контроль советен бөтөрөү көнбайыш державалар властәренең Берлиндә артабан ҡалыуҙарының законлылығын һорау аҫтына ҡуя тип, күп тапҡырҙар күрһәттеләр. Ошондай шикләнеүҙәр арҡаһында булһа кәрәк, һуңғы ярты йыл эсендә Берлиндән көнбайыш зоналарға тимер юлдар һәм автострадалар буйынса промышленность оборудованиеһе, әҙер тауарҙар, сырье һәм башҡа материаль ҡиммәттәр сығарыла. Ҡиммәтле нәмәләрҙең байтаҡ күләме ошондай уҡ юл менән совет оккупацияһы зонаһынан да алып кителде.

Союзный хәрби поездарҙа йөрөүгә хоҡуҡтары булмай тороп та бындай кешеләрҙең законһыҙ рәүештә йөрөүҙәренең практикаға инеүе Берлин һәм көнбайыш зоналар араһындағы коммуникацияларҙа билдәләнгән режимде тупаҫ рәүештә боҙоу булып тора. Совет контроль постарының демаркацион һыҙыҡтарҙа гәзәттә хәрби пассажирҙарҙың документтәрен тикшермәүҙәренән файҙаланып, эре спекулянттар, үҙ ваҡытында совет зонаһынан ҡасып киткән политик шикле кешеләр һәм хәрби енәйәтселәр контролһеҙ рәүештә Берлингә һәм Берлиндән совет зонаһы территорияһы буйынса йөрөү өсөн ошо поездар менән файҙалана башланылар. Был, контроль советенең 43-сө номерле директиваһын туранан-тура боҙоу булып тора. Был директивала, немец граждандарының бер зонанан икенсе зонаға барыу өсөн берҙәм өлгөләге зона-ара пропускылары булырға тейеш, тип әйтелгәйне. Шулай итеп, нормаль булмаған хәл килеп тыуҙы: совет зонаһы транспорты көнбайыш зоналарында үҙҙәренә даими ҡасыу урыны табыусы спекулянттар, хәрби енәйәтселәр һәм политик шикле кешеләр менән тулды, ә шул уҡ ваҡытта иһә немец эшлекле ҡругтарының зоналар араһындағы сауҙаны үҫтереү менән ҡыҙыҡһынған вәкилдәре быны арҡаһында поездарҙа ҡыйынлыҡтар кисерҙеләр.

Совет хәрби администрацияһының зоналар араһындағы бәйләнештәрҙе үҫтереүгә серьез иғтибар биргәнлеген билдәләп үтергә кәрәк. Быны иҫбатлау өсөн, айырым алғанда, ошо йылдың март башында Лейпцигта үткәрелгән йәрминкә хеҙмәт итә ала. Бында Германияның көнбайыш зоналарынан һәм сит илдәрҙән экспонаттар менән ике мең кеше һәм 35 меңгә яҡын кеше бында ҡатнашыу өсөн килде.

Ошо килтерелгән фактылар йөҙөнлә һәм совет зонаһы территорияһында кешеләрҙе һәм йөктәрҙе ҡурҡынысһыҙ рәүештә йөрөтөүҙе тәьмин итеү һәм законлылыҡты еренә еткереү интерестәренлә совет оккупацион властәре демаркацион һыҙыҡта һәм совет зонаһы территорияһы буйынса үтеүсе коммуникацияларҙа контролде яҡшыртыу буйынса ҡайһы бер өҫтәмә саралар күрергә мәжбүр булдылар.

30 мартта Германиялағы совет хәрби администрацияһы баш начальствующийының урынбаҫары генерал-лейтенант Дратвин ошо йылдың 1 апреленән башлап совет командованиеһенең демаркацион һыҙыҡта һәм Германияның Совет һәм көнбайыш оккупация зоналары араһындағы коммуникацияларының режимға ҡайһы бер өҫтәмә ҡағиҙәләр индереүе тураһында АҠШ-тың, Англияның һәм Францияның Берлиндәге хәрби администрацияларының штаб начальниктәренә яҙма рәүештә белдерҙе. Был хатта, совет хәрби администрацияһы зоналар араһындағы бәйләнештәрҙе киңәйтеүгә төрлө саралар менән ярҙам итергә уйлай, ләкин пассажирҙарҙе һәм йөктәрҙе йөрөтөүҙең имсинселеген тәьмин итеү маҡсатында, шулай уҡ оккупацион властәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙә ыңғайһыҙлыҡ тыуҙырыуға иҫәп тотолған хәбәрҙәрҙе иҫкәртеү өсөн ойошҡанлыҡты, тәртипте һәм контролде талап итә, тип айырыуса билдәләнде. Совет оккупацияһы зонаһында тыныс экономиканы үҫтереү өлкәһендә, шулай уҡ зоналар араһындағы сауҙаны һәм немец халҡының йәшәү кимәлен күтәреү маҡсатында зона эсендә тауар әйләнешен үҫтереү өлкәһендә хәҙер серьез бурыстар ҡуйылыуы арҡаһында совет зонаһы транспортына ла талаптар ҙурайҙы.

Совет оккупацион властәре тарафынан индерелгән өҫтәмә положениелар түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

1. 1948 йылдың 1 апреленән башлап хәрби администрацияның Америка, Британия һәм Франция подданствоһындағы һәм Берлин—Гельмштедт автострадаһы буйынса совет оккупацияһы зонаһы аша барыусы бөтә хәрби һәм шулай уҡ гражданский сотрудниктәре һәм уларҙың семьялары Мариенборн һәм Нововесь контроль-пропуск пункттарында үҙҙәренең личностәрен һәм Германиялағы хәрби администрация органдарында тороуҙарын раҫлаусы документтәрен күрһәтергә тейештәр. Хәрби администрация органдарында тороуҙарын билдәләүсе документтәрҙе күрһәтеүҙең ошондай уҡ тәртибе Мариенборн пункты аша көнбайыш зоналарға, шулай уҡ көнбайыш зоналарҙан Германияның совет оккупацион зонаһына барыусы тимер юл поездары пассажирҙарына ла тарала.

Хәрби администрациялар органдарында тормаусы кешеләр элек билдәләнгән тәртиптә пропускылар буйынса совет зонаһына инә һәм унан сыға алалар.

2. Хәрби властәрҙеке булған һәм Германияның көнбайыш зоналарына сығарыла торған йөктәр Берлин ҡалаһының совет комендантының йәки СВАГ (Германияның совет хәрби администрацияһы) тышҡы сауҙа управлениеһенең рөхсәте буйынса ғына контроль-пропуск пункттары аша тейәү өсөн ҡабул ителәләр һәм ебәреләләр, ә көнбайыш зоналарҙан совет зонаһына тейешле документтәр буйынса ебәреләләр.

3. Контроль-пропуск пункттары аша йөрөүсе кешеләрҙең бөтә әйберҙәре, Американың, Британияның һәм Францияның хәрби администрациялар органдарында эшләүсе хәрби хеҙмәткәрҙәре һәм гражданский сотрудниктәре ҡулдарында булған шәхси әйберҙәрҙән башҡалары, был пункттарҙың персоналы тарафынан тикшереләсәк.

Британия генералы Брауниджон, Америка генералы Хейли һәм Франция генералы Нуарэ үҙҙәренең яуап хаттарында, Берлин һәм көнбайыш зоналар араһында транспорт йөрөшөн ойоштороуҙы һәм уның өҫтөнән контроль яһауҙы билдәләүгә совет командованиеһенең хоҡуҡын инкар итмәйенсә, шуға ҡарамаҫтан, совет зонаһы территорияһында транспорт йөрөшө мәсьәләләренең совет оккупацияһы зонаһындағы тәртип һәм тынысылыҡ өсөн яуап биреүсе совет оккупация властәренең генә эше икәнлеге улар өсөн бик асыҡ булырға тейеш икәнлегенә ҡарамаҫтан, өҫтәмә положениеларҙе хәрәкәткә индереүҙе кисектерергә һәм уларҙы дүрт держава ҡатнашлығында тикшереүгә өлгәшергә маташтылар. Хейли һәм Брауниджон хаттарында шулай уҡ тимер юл буйынса йөрөүсе пассажирҙарҙе һәм йөктәрҙе тикшереүгә ҡаршы киләләр. Хейли совет контроль-пропуск пункттарында бөтә пассажирҙарҙең поезд юлында йөрөү өсөн булған документтәренең күсермәләрен исемлектәргә яҙып, поезда йөрөүсе пассажирҙарҙың исемлектәрен генә биреүгә Америка властәренең ризалығы тураһында белдерҙе. Америка властәренең документтәрҙән үҙҙәрен түгел, ә уларҙың күсермәләрен күрһәтеүҙе ни өсөн яҡшыраҡ тип тапҡанлыҡтарын Хейли аңлатманы. Шулай уҡ Хейлиҙең һәм уның коллегаларының совет патрулдәренен ниндәй ҙә булһа аңлашылмаусылыҡты булдырмау маҡсатында совет зонаһы аша үтеүсе кешеләрҙең документтәрен тикшереүҙәрен ни өсөн теләмәүҙәре лә асыҡланмаған килеш ҡала.

Демаркацион һыҙыҡта һәм коммуникацияларҙа контролде көсәйтеү тураһында совет командованиеһенең бойороғо 1 апрелдә үҙенең көсөнә инде.

Законлылыҡты хөрмәт итеүселәрҙең бәтәһе лә был бойороҡтан ҡәнәғәт булдылар. Быны шулай кәтәргә кәрәк ине лә. Совет зонаһындағы һәм Берлиндәге немец идара органдарының вәкилдәре, демократик матбуғат, политик партиялар деятелдәре, шулай уҡ эшселәр һәм крәҫтиәндәр һәм интеллигенттәр совет властәренен һуңғы сараһын демократик тәртипте артабан нығытыуға, зоналар араһындағы бәйләнештәрҙе киңәйтеүгә һәм киләсәктә оккупацион властәр араһында үҙ-ара аңлашыу булдырыуға яһалған аҙым итеп баһалайҙар.

Тәртипте һәм законды боҙоусылар был бойороҡҡа бөтөнләй башҡаса ҡараһылар. Ошо ҡругтарҙың фекерен белдереп, Берлиндең көнбайыш секторҙары гәзеталары булмаған «тимер шаршау» тураһында, «блокада» тураһында һәм Берлинде «һауа күпере» буйынса тәьмин итеү кәрәклеге һәм башҡалар тураһында тауыш күтәрҙеләр.

Өҫтәмә положениелар индереүҙең беренсе көнөндә үк совет һәм көнбайыш оккупация зоналары араһындағы хәрәкәт тулыһынса тәртип менән һәм бер ниндәй ҙә ваҡиғаларһыҙ барҙы. Мариенборн тимер юл станцияһы аша контроль процедураһы үткәрелгәндән һуң французлар, американлылар һәм немец пассажирҙаре ултырған бер нисә поезд һәм шулай уҡ йөктәр тейәлгән поездар ике яҡҡа ла үтеп киттеләр. Быларға кәрәкле документтар яҙылды. Айырым поездарҙың комендантары ниндәй булһа ла сәбәптәр буйынса пассажирҙарҙең документтәренә йәки йөккә булған документтәргә контроль үткәреүҙән баш тартҡан ваҡиғаларҙа, бындай поездар үҙҙәренең сыҡҡан станцияларына кире ебәрелделәр. Берлин—Гельмштедт автострадаһында контролдең көсәйтелеүе һөҙөмтәһендә беренсе көндә үк промышленность тауарҙары һәм аҙыҡ-түлек тейәлгән бик күп автомашиналар тотолдо. Улар совет зонаһынан һәм Берлиндән башҡа зоналарға бара инеләр. Һәм быға совет оккупацион властәре көнбайыш зоналарға ебәрелеүенә рөхсәт итмәгәйнеләр. Берлиндең көнбайыш секторҙары халҡтары өсөн аҙыҡ-түлек килтереүсе поездар үҙҙәренең урындарына һис бер ҡаршылыҡһыҙ барып еттеләр.

Алыҫ көнсығыш комиссияһындағы Совет делегацияһының позицияһын боҙоп күрһәтергә маташыу

НЬЮ-ЙОРК, 5 апрель. (ТАСС). Вашингтондан хәбәр итеүгә ҡарағанда, Алыҫ Көнсығыш Комиссияһы Японияла хәрби деятельносте тыйыу тураһында һәм Японияны демилитаризациялау тураһында 12 февралдә ҡабул иткән ҡарарын иғлан итте. Америка оккупацион ғәскәрҙәре командующие генерал Макартурға директива ебәрелгән. Был директива «Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының» ошо күрһәтелгән ҡарарын үтәргә ҡуша.

Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының ҡарары Японияға ҡоралдарҙың, һуғыш припастарының һәм һуғыш материалдарының ниндәй ҙә булһа төрҙәрен эшләп сығарыуҙы йәки үҫендә тотоуҙы, коммерческий йәки хәрби авиация, аэродромдар, авиабазалар һәм нығытмалар биләүҙе, шулай уҡ хәрби лабораторияларҙа тикшеренеүҙәр алып барыуҙы, хәрби техник проблемалар эшләүҙе һәм хәрби уйлап сығарыуҙарға патенттар биреүҙе тыя. Макартурға Японияла хәрби ойошмаларҙы, хәрби академияларҙы һәм башҡаларҙы аяҡҡа баҫтырыуҙы тыйыу эше тапшырыла.

Ләкин ошо пункттар менән бер рәттән, ҡарарҙа Японияны демилитаризациялауҙың иң мөһим мәсьәләләре буйынса дөйөм һәм ике мәғәнәле формулировкалар бар. Был формулировкаларға совет делегацияһы ҡаршы килде. Совет делегацияһының позицияһын общественный фекерҙән йәшерергә тырышып һәм уны боҙоп күрһәтергә маташып, АҠШ-тың Алыҫ Көнсығыш Комиссияһындағы вәкиле, Юнайтед Пресс агентлығының хәбәрсеһенең Вашингтондан хәбәр итеүенә таянып, имеш, Советтар Союзы техник тәртиптәге сәбәптәр буйынса Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының ошо күрһәтелгән ҡарарын формаль рәүештә хупллауҙан баш тартты, тип белдерҙе.

Ләкин Алыҫ Көнсығыш Комиссияһындағы АҠШ вәкиленең был белдереүе ысынбарлыҡҡа ярашлы түгел. Асылда Совет делегацияһы «техник тәртиптәге» сәбәптәр буйынса түгел, ә бик мөһим принципиаль фекерҙәр буйынса тауыш биреүҙә ҡатнашыуҙан тыйылып ҡалды. Был фекерҙәр Совет делегацияһы тарафынан Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының ҡарар проектын тикшергән ваҡытта әйтеп бирелделәр.

Ҡарар проектында, Японияға ҡорал, һуғыш припастары һәм һуғыш алып барыу өсөн башҡа саралар биләү тыйыла, Японияның граждандар полицияһы органдарына ғына винтовкалар, пистолеттәр һәм башҡа «вак ҡорал» менән файҙаланыу рөхсәт итәлә, тип күрһәтелде.

Тикшереү барышында, «вак ҡорал» термины аҫтында Америка вәкилдәренең ҡул пулеметтары, еңел ҡоралдарҙы шулай уҡ йәш ағыҙыусы бомбаларҙы аңлағанлыҡтары асыҡланды.

Совет делегацияһы өҫтәмә индерҙе. Был өҫтәмәлә, «төркөмләп ҡулланыла торған ҡорал, ярсыҡтары менән массовый рәүештә тәьҫир итә торған ҡорал, вак ҡоралдар исемлегенә инмәй, ә бер кеше тарафынан йөрөтөлә һәм ҡулланыла торған ҡорал ғына иҫәпкә тотола», тип әйтелә.

Алыҫ Көнсығыш Комиссияһы члендәре Совет делегацияһының был өҫтәүен ҡабул итергә риза булмағанлыҡтан, СССР делегацияһы, ҡарарҙы тотошо менән ҡабул итеүгә ҡомасаулыҡ итергә теләмәйенсә, ошо күрһәтелгән төҙәтеүҙе ҡабул итеүҙе ныҡышмалы рәүештә талап итмәҫкә мөмкин тип иҫәпләне, ләкин үҙенең юғарыла күрһәтелгәнсә вак ҡорал төшөнсәһенә яһаған төҙәтмәһен ҡарарға ҡушып яҙырға тәҡдим индерҙе.

Ҡарар проектына шулай уҡ, Япония армияһынан йәки граждандар халҡынан алынған хәрби снаряжение юҡ ителергә йәки тикшерелгәндән һуң боҙоу өсөн тапшырылырға тейеш, тип әйтелә. Совет делегацияһы, «тикшерелгәндән һуң» тигән төшөнсә артыҡ дөйөм төшөнсә булып тора, тип белдерҙе. Совет делегацияһы «тикшерелгәндән һуң» тигән һүҙҙәрҙе проекттан төшөрөп ҡалдырырға тәҡдим индерҙе, һәм Япония капитуляция яһағандан һуң ике йылдан артыҡ ваҡыт, йәғни япондарҙан алынған хәрби снаряжениене тикшереүҙе, шулай уҡ боҙоуға тапшырыуҙы тулыһынса тамамлау өсөн ҡарағанда тыш етерлек срок үтте инде, тип билдәләне. Алыҫ Көнсығыш Комиссияһы члендәренең күпселеге совет делегацияһы тәҡдиме менән килештеләр. Совет делегацияһы, «тикшергәндән һуң» тигән һүҙҙәрҙе ҡарарға индереү хәрби снаряжениене юҡ итеү сроктарын оҙайтыу өсөн файҙаланыласаҡ, тип күрһәтте. Ләкин, был тәҡдимгә АҠШ делегацияһы һәм Англия делегацияһы ҡаршы килгәнлектән, ҡабул ителмәне.

Шулай итеп, юғарыла килтерелгән фактыларға ҡарағанда, Совет делегацияһы техник сәбәптәр буйынса түгел, ә был документтең эстәлегенә ҡағылышлы фекерҙәр буйынса Алыҫ Көнсығыш Комиссияһы ҡарарының ошо күрһәтелгән пункттарын хупллауҙы үҙе өсөн мөмкин түгел, тип иҫәпләне.

Совет делегацияһының тауыш биреүҙә ҡатнашмауының төп сәбәптәре шундайҙар. СССР делегацияһы үҙенең белдереүендә, Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының был ҡарары Японияла демилитаризация үткәреү эшендә бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора, тип айырыуса билдәләне. Совет делегацияһы уға был документтең хәлен яҡшыртыусы күп кенә төҙәтеүҙәр индерҙе. Ләкин, — тип билдәләне Совет делегацияһы, — документте тикшереү барышы күрһәткәнсә, ҡайһы бер мөһим пункттарға яһалған Совет төҙәтеүҙәре, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡабул ителмәнеләр, һәм СССР делегацияһы уларҙы ҡайтанан тикшереү хоҡуҡын үҙендә ҡалдырғанлығын белдерҙе.

Дөрөҫлөктө һөйләүсе фактылар шундайҙар.

ШЕФКА АЛЫНҒАН КОЛХОЗДАР ӨСӨН

Өфө ҡалаһының Киров районындағы ойошмаларҙың коллективтәре Ҡырмыҫҡалы һәм Ҡы[illegible] районы колхозларына шефлыҡ итәләр. Һуңғы айҙар эсендә шефлыҡ итеүсе ойошмалар колхозларға байтаҡ ҡына ярҙам күрһәттеләр. Мәҫәлән, республиканың урындағы промышленность Министерствоһы Ҡырмыҫҡалы районының «Коммунар» колхозына массовый-политик эште ойоштороуҙа булышлыҡ күрһәтһә, производство-хужалыҡ кәрәктәренә 10 данә сәнә, 135 килограмм ҡалай, бер йәшник тәҙрә быялаһы, тоҡ өсөн 120 метр материал ебәрҙе. Бынан тыш колхозға 10 стан туғын, 20 дана ҡамыт мөйәте, 20 бәҙрә, 20 комплект сбруй өсөн ҡайыш бүлде.

«Башглавлестеп» республиканың конторалы коллективе үҙе шефлыҡ иткән «Алға» колхозының (Ҡырмыҫҡалы районы) ҡыҙыл мөйөштө йыһазландырыу өсөн 5 килограмм ҡағыҙ, 25 табаҡ фанера, 50 килограмм ҡаҙаҡ, 5 кубометр таҡта материалдары һәм башҡалар менән ярҙам итте.

Хәҙер яҙғы сәсеү яҡынлашыу уңайы менән шефлыҡ итеүсе ойошмаларға был эште тағы ла көсәйтеп ебәрергә кәрәк.

А. Ғиматов.

Һал ағыҙыуға әҙерлек үҙ ағышында

Әүжән леспромхозы быйыл яҙ 9[illegible] мең кубометр ағасты Ҡағы һәм Ҙур Әүжән йылғалары буйлап Ағиҙелгә төшөрөргә тейеш. Ара алыҫ түгел. Ҡағы пристане Ағиҙелгә 2[illegible] километр булһа, ә Ҙур Әүжән пристане 12 километр ғына. Шулай ҙа ҡыуғынды үҙ ваҡытында яҡшы әҙерлек менән башланаған ла, эштең оҙаҡҡа һуҙылыу ҡурҡынысы бар. Кәрәгенсә әҙерләнмәү арҡаһында үткән йылда ҡыуғын бер айға һуҙылды.

Быйыл да әҙерлек шәптән түгел. Ҡоролмалар, ҡуҙлалар әле булһа эшләнеп бөтмәгән. Йылға уртаһында ултырған затор тотороусы ағас һәм таштарҙы таҙартыу-шартлатыу эше лә башланмаған. Ҡыуғынсыларға эш шарттары тыуҙырыу тураһында хәстәрлек күрелмәй. Улар өсөн сезонға етерлек продукттар, өҫ һәм аяҡ кейемдәре лә леспромхозға килтерелмәгән.

Бында ҡыуғында меңдән артыҡ эшсе эшләргә тейеш. Ләкин бөгөнгө көндә уларҙың береһе лә әле эш урынына килмәгән.

Ә леспромхоз директоры Хесәнов, ОРС начальниге Смирнов иптәштәр «ҡыуғын сезоны быйыл һуңлап башланасаҡ, уға өлгөрөрбеҙ але», тип үҙ-үҙҙәрен тынысландырғандар.

Ғ. Ҡотлобаев.

Яуаплы редактор урынбаҫары
З. Ю. ВАХИТОВ.

ГОСУДАРСТВО СТРАХОВАНИЕҺЕ

колхоздарға стихиялы бәлә-ҡазалар һөҙөмтәһендә килеп тыуған зыяндарҙы түләүҙе ТӘЬМИН ИТӘ.

КОЛХОЗДАР боҙ яуыу, көслө ямғырҙар, дауылдар һәм башҡа стихиялы бәлә-ҡазаларҙан һәләк булыу ваҡиғаһынан сәсеүлектәрҙе, шулай уҡ емеш-еләк баҡсалары һәм виноград баҡсалары урожайын ирекле рәүештә СТРАХОВАТЬ ИТӘ АЛАЛАР.

Страхование төҙөү өсөн Госстрахтың район инспекцияларына мөрәжәғәт итегеҙ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — ФЛОРИА ТОСКА.

«Октябрҙә» — СОВЕТ БАШҠОРТОСТАНЫ.

«Салауатта» — ГЕОРГИЙ СААКАДЗЕ.

Матросов исемендәге кинола — «КОНЕК-ГОРБУНОК».

1948 йылдың 11 апреленә, Өфө ҡалаһының Киров районы үҙәк һаҡлыҡ кассаһы бинаһында, 11 сәғәттә, отошло вкладтарҙың 11-се тиражы уйнала.

Отош тиражы асыҡ тәртиптә үткәрелә.

Тиражда ҡатнашырға теләгән кешеләрҙең бөтәһе лә саҡырылалар.

Тираж комиссияһы.

Башҡорт АССР-ы Финанс Министерствоһы предприятие, учреждение һәм ойошмалар етәкселәренә, баш бухгалтерҙәренә буйҙаҡтар һәм аҙ семьялылар, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең, ирҙәре Ватан һуғышы фронтында һәләк булған һәм хәбәрһеҙ юғалған тол ҡатындар өсөн, СССР граждандарына 1947 йылда һалымдар буйынса бирелгән льготалар, СССР Министрҙәр Советенең 1948 йыл 30 мартта сығарған 1030-сы номерлы ҡарары буйынса, ошо йыл аҙағына тиклем көсөндә ҡалдырылғанлыҡты белдерә.

Башҡорт АССР-ы Финанс Министерствоһы.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—26-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00117. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

29-сы йыл сыға

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

№ 73
1948 йыл
11
апрель
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Министрҙәр Советендә. Ҡайһы бер тауарҙарға ваҡлап һатыу буйынса берҙәм государство хаҡтарын 1948 йылдың 10 апреленән башлап яңынан кәметеү тураһында. (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын орденлар һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (2—3-сө биттәр).

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһының Мәскәүҙән китеүе. (1-се бит).

СССР менән Швейцария араһындағы сауҙа килешеүҙәренең үҙ көсөнә инеүе. (1-се бит).

Беҙҙең республикала. (1-се бит).

Баязит Бикбай. — Бөйөк рус драматургы А. Н. Островский. (4-се бит).

Рәхмән Кәлн. — Ҡала хеҙмәтсәндәренә индивидуаль баҡсасылыҡ эшендә ярҙам итергә. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Коммунистәрҙең бөтә көсөн конференция ҡарарҙарын үтәү өсөн көрәшкә туплауға

Өлкә партия ойошмаһының XXI конференцияһы ВКП(б) Өлкә Комитетенең һигеҙ йыллыҡ эшенә йомғаҡ яһап, Башҡортостан большевиктәре өсөн боевой эш программаһы билдәләп ҡалдырҙы. Хәҙер республикабыҙҙың бөтә ҡалаларында һәм райондарында XXI конференцияның ҡарарҙарын өйрәнеүгә арналған актив йыйылыштары үтә. Шул уҡ ваҡытта партияның тәүге ойошмаларында өлкә һәм район конференцияларының ҡарарҙарын өйрәнеү, үҙ ойошмаларының отчет-һайлау йыйылыштарында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереүгә арналған йыйылыштар үткәрелә.

Хәҙер партия райкомдары, тәүге ойошмалар өлкә һәм район конференцияларының ҡарарҙарын актив йыйылыштарында, дөйөм партия йыйылыштарында ВКП(б)-ның һәр бер ағзаһына һәм һәр бер кандидатына еткерә, коммунистәрҙең бөтә ижади көстәрен ошо ҡарарҙарҙы үтәү эшенә туплауға тейештәр. Шуға күрә был йыйылыштарҙы рядовой коммунистәрҙең ҙур активлеге менән, киң йәйелдерелгән большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит аҫтында, юғары идея-политик кимәлдә үткәреүгә айырыуса иғтибар бүлергә кәрәк.

Бәрә районы партия активенең йыйылышы өлкә партия ойошмаһының XXI конференцияһы йомғаҡтары тураһында райком секретаре иптәш Русановтың докладын тыңлап, үткән йыл райондың колхоздарында урожайлылыҡты күтәреү, государствоға ҡарышлыҡтарҙы бурыстарҙы үтәүҙә ҡайһы бер уңыштарға өлгәшелде һәм әле партия ойошмаһының эшендә сирьеҙ етешһеҙлектәр булыуын әйтте. Йәш коммунистәр тәрбиәләү эше бик йомшаҡ ҡуйылған. 131 коммунист бер ҡайҙа ла уҡымай. Ленин һәм Орджоникидзе исемендәге колхоздарҙың һәм «Металлист» артеленең партия ойошмаларында партия йыйылыштары һирәк үткәрелә, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә юнәлтелгән большевистик тәнҡит бик йомшаҡ йәйелдерелгән.

Партияның өлкә конференцияһы партия ойошмаларын хужалыҡ ойошмаларының эштәрен үҙ өҫтәренә алыу, ләкин уларҙың производство торошо өсөн яуаплылығын кәметеүгә юл ҡуймаҫҡа ... партия ойошмалары совет һәм хужалыҡ органдарының политик юнәлеш бирергә һәм был ойошмаларҙың эшмәкәрлегенә даими контроллек итергә тейештәр. Ләкин бына Шишмә районының «Ҡыҙыл байраҡ», «Красное поле», 8 март исемендәге колхоздарының партия ойошмалары тик хужалыҡ эштәре менән генә мауыҡып, массово-политик эште, агитколлектив тәрбиә эшенә етәкселек итеүҙән ситләшкәндәр. Конференцияның әлеге һәм ... күрһәтмәләренән һуң да үҙҙәренең эштәрен ҡабаттан ҡорорға ашыҡмайҙар.

Хәҙер республикабыҙҙағы бөтә ВКП(б) райкомдарының һәм тәүге партия ойошмаларының бурысы — партия ойоштороу һәм партия политик эште бөгөнгө көн талаптары кимәленә күтәреүҙән тора. Конференция ҡарарҙарының талабына ярашлы рәүештә, ауыл еренәге партия ойошмалары коммунистәрҙе колхоз производствоһының иң яуаплы участкаларына урынлаштырырға, уларҙан хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәттә булыуҙы шәхси өлгәләрен күрһәтеүҙе талап итергә һәм шул юл менән ауыл хеҙмәтсәндәренең бөтә көсөн яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы үтәү өсөн көрәшкә туплауға бурыслылар. Промышленность предприятиеларының партия ойошмалары коммунистәр һәм агитаторҙар аша массово-политик эште киң йәйелдереү юлы менән эшселәрҙе производство ритмлы һәм рентабелле эшләүе өсөн, биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә күтәреү буйынса даими эш алып барырға бурыслылар.

Һәр бер коммунистең үҙе эшләгән участкала большевистик етәкселек итә белеүе ... партия ойошмалары коммунистәрҙең политик белем кимәләрен күтәреү, идея үҫештәрен тәьмин итеү тураһында даими хәстәрлек күрергә һәм систематик эш алып барырға тейештәр. Бының өсөн бөтә коммунистәрҙе политик уҡыу селтәре һәм ... политик мәктәптәрҙең эштәрен, политик белем кимәлдәрен күтәреү өсөн үҙ аллы ... иптәштәрҙең уҡыуҙарын партия ойошмалары контролдә тотоуҙы булдырырға, консультациялар, беседалар, теоретик конференциялар үткәреү юлы менән уларға ярҙам күрһәтергә кәрәк.

Хәҙер республикабыҙ партия ойошмалары һәм һәр бер коммунист бөтә көсөн партияның XXI өлкә конференцияһы ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшкә туплауға бурыслылар.

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһының Мәскәүҙән китеүе

Финляндия Премьер-Министре М. Пеккала әфәнде, Сит ил Эштәре Министре К. Энкель һәм Р. Свенто әфәнделәр, Эске Эштәр Министре Ю. Лейно әфәнде, Финляндия Сеймының Вице-Председателе У. Кекконен әфәнде, Сейм депутаттары О. Пелтонен һәм И. Седерьельм әфәнделәр һәм башҡа официаль кешеләр составындағы Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы 9 апрелдә Мәскәүҙән китте.

Китеүселәрҙе Ленинград вокзалында СССР Министрҙәр Советы Председателенең Урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов, СССР Сит ил Эштәре Министренең Урынбаҫарҙары А. Я. Вышинский һәм В. А. Зорин, СССР Тышҡы сауҙа Министренең Урынбаҫары А. Д. Крутиков, Мәскәү Советы Председателенең Урынбаҫары П. В. Абрамов, генерал-лейтенант Н. В. Славин, Мәскәү ҡалаһы коменданты генерал-лейтенант К. Р. Синилов, СССР Сит ил Эштәре Министрлығының 5-се Европа Бүлеге Мөдире А. Н. Абрамов оҙатып ҡалдылар.

Китеүселәрҙе шулай уҡ Финляндияның Посланнигы К. Сундстрем әфәнде етәкселегендә СССР-ҙағы Миссияһы члендәре һәм Мәскәүгә вәкил итеп ебәрелгән күп кенә Посольстволарҙың һәм Миссияларҙың етәкселәре оҙатып ҡалдылар.

Бер үк ваҡытта СССР-ҙың Финляндиялағы Посланнигы Г. М. Савоненков Мәскәүҙән китте.

Оҙатыу ваҡытында почетлы ҡарауыл тереҙе һәм Финляндияның, Советтар Союзының государство гимндары башҡарылды.

Вокзал Финляндия һәм Совет флагтары менән биҙәлгәйне.

СССР Сит ил Эштәре Министрлығының Протоколдар Бүлеге Мөдире Ф. Ф. Молочков Хөкүмәт Делегацияһын Совет-Финляндия сигенә тиклем оҙатып бара. (ТАСС).

—☆—

СССР менән Швейцария араһындағы сауҙа килешеүҙәренең үҙ көсөнә инеүе

ССР Союзы Хөкүмәте һәм Швейцарияның Федеральный Советы ССР Союзы һәм Швейцария араһындағы тауар әйләнеше тураһындағы һәм СССР-ҙың Швейцариялағы Сауҙа Вәкәләте тураһындағы ошо йылдың 17 мартында Мәскәүҙә ҡул ҡуйылған Килешеүҙәрҙе хупланылар.

Шулай итеп күрһәтелгән Килешеүҙәр 1948 йылдың 1 апреленән башлап үҙ көстәренә инделәр.

(ТАСС).

Бүрәнә тейәү машинаһы — элеватор

ХАРЬКОВ. (ТАСС). Көньяҡ тимер юлының тереү-аяҡҡа баҫтырыу управлениеһының инженерҙәре Номинас, Гарбуз, Баранов иптәштәр бүрәнә тейәү өсөн элеватор машинаһы конструкцияланылар. Ул металдан эшләнгән рамдан тора. Рам буйлап юғары һәм түбән табан сылбыр йөрөй. Был сылбырҙарға ырғаҡ элдектәрмәләр беркетелгән. Ырғаҡтар бүрәнәләрҙе ерҙән күтәреп, тимер юл платформаларына һалалар.

Һынау үткәрелгән ваҡытта машина 8 сәғәт эсендә 400 кубометр бүрәнә тейәне. Был эште башҡарыу өсөн 38 кеше кәрәк булыр ине.

СССР Министрҙәр Советендә

Ҡайһы бер тауарҙарға ваҡлап һатыу буйынса берҙәм государство хаҡтарын 1948 йылдың 10 апреленән башлап яңынан кәметеү тураһында

1947 йылдың 16 декабрендә акса реформаһы үткәрелеү менән бер үк ваҡытта аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары менән тәьмин итеүҙә карточка системаһы бөтөрөлгәйне. «Коммерческий сауҙа буйынса юғары хаҡтар бөтөрөлгәйне һәм аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу буйынса государствоның берҙәм түбәнәйтелгән хаҡтары индерелгәйне. Был промышленность һәм аҙыҡ-түлек тауарҙарына хаҡтарҙы кәметеүҙең беренсе этабы булды.

СССР халыҡ хужалығының дәүәм күтәрелеше һәм ҡулланыу әйберҙәрен эшләп сығарыуҙың үҫеүе айҡанлы ССР Союзы Министрҙәр Советы күп кенә тауарҙарға хаҡтарҙы кәметеүҙең икенсе этабын тормошҡа ашырыуҙы кәрәк һәм шуның менән эшселәрҙең һәм хеҙматкәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡын һәм крәҫтиәндәрҙең доходтарын артабан күтәреүҙе, шулай уҡ һумдың һатып алыу һәләтлеген арттырыуҙы тәьмин итеүҙе кәрәк тип тапты.

ССР Союзы Министрҙәр Советы ҡарар итте:

1. 1948 йылдың 10 апреленән башлап түбәндәге тауарҙарға ваҡлап һатыу буйынса берҙәм государство хаҡтарын уртаса алғанда түбәндәгеcә кәметергә:

«Москвич» маркалы еңел автомобилдар	10%-ка
Мотоциклдар	20%-ка
Велосипедтар	20%-ка
Һунар мылтыҡтары	15%-ка
Тегеү машиналары	10%-ка
«Рекорд» һәм «Родина» радиоприемниктәр	10%-ка
Динамик репродукторҙар	20%-ка
Патефондар	20%-ка
Баяндар	10%-ка
Аккордеондар	12%-ка
«Мәскәү» маркалы фотоаппараттар	10%-ка
Театр биноклдәре	10%-ка
Ҡеҫә һәм ҡул сәғәттәре (металдан эшләнгән)	12%-ка
Ювилер көмөш һәм металлик галантерея	20%-ка
Пластмассанан эшләнгән күп кенә киң ҡулланыу тауарҙары	20%-ка
Папиростар, сигаралар һәм сигареттар	10%-ка
Парфюмерия-косметик тауарҙар	10%-ка
Примустар, керогаздар һәм электроплиткалар	10%-ка
Араҡы, ликер-араҡы изделиеләре, вино, һыра һәм алкоголһеҙ эсемлектәр	20%-ка
Ҡара икра	10%-ка
Кета икраһы	20%-ка
Витаминдар	20%-ка

2. СССР Сауҙа Министрлығына (иптәш Жаворонкова) был ҡарарға ярашлы рәүештә ошо ҡарарҙың 1-се пунктында һанап үтелгән тауарҙарға ваҡлап һатыу буйынса государствоның түбәнәйтелгән берҙәм яңы хаҡтарын билдәләү эшен тапшырырға.

— БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА —

Предприятиеләрҙә май алды ярышы

◆ ◆ ◆

Ярышта еңеүселәр

Май алды социалистик ярышын киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә «Башптицепром» предприятиеләре беренсе квартал планын байтаҡ арттырып үтәнеләр.

Ярышта Мөсәлләмов, Абдулов, Мәлеков, Банюшов иптәштәр етәкселек иткән Шишмә, Бәләбәй птицекомбинаттары, Дәүләкән һәм Кушнаренко птицеконторалары коллективтәре алда баралар. Кушнаренко птицеконтораһында квартал планының үтәлеше 245,7 процент тәшкил итте.

Беренсе Май байрамын достойн ҡаршылау өсөн ярыш дауам итә.

А. Кучуков.

—☆—

Графиктән алда

— Апрель айы планын беренсе майға 120 процентҡа үтәргә, производствола юғалтыуҙарҙы 30 процентҡа кәметергә.

Беренсе квартал планын 106,3 процентҡа үтәгән Сәй төрөү фабрикаһы коллективы байрам алды ярышына ҡушылып, шундай йөкләмә алғайны.

Хәҙер йөкләмәне үтәү өсөн ныҡышмалы көрәш бара. Графикта билдәләнгән заданиеләр арттырылып үтәлә. Әстахановкалар Ғәзизова, Яппарова, Дмитриева, Сафина һәм башҡа күп иптәштәр һәр сменала бер ярым — ике норма бираләр.

И. Бикметов.

—☆—

Йөкләмәләр үтәлә

Өфө синтетик заводы коллективе май алды социалистик ярышына ҡушылып, дүрт айлыҡ планды 1 майға 115 процентҡа үтәргә, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын, үткән йылға сағыштырғанда, 4,5 процентҡа түбәнәйтергә йөкләмә алғайны.

Коллектив алған йөкләмәһен намыҫлы рәүештә тормошҡа ашыра. Начальниктары Бейзеров, Молев иптәштәр булған цехтар көндәлек заданиеләрҙе 130—135 процентҡа үтәйҙәр. Стахановка Суворова, Васильева һәм башҡа күп эшселәр көн һайын бер ярымышар норма бираләр.

9 көн эсендә апрель айының планы 40 процентҡа үтәлде инде. Хәҙер коллектив дүрт айлыҡ планды 15 апрелгә тамамлап сығыу өсөн көрәшә.

А. Имангул.

—☆—

Горняктәр — байрамға

Учалы рудниге коллективе байрам алды социалистик ярышына ҡушылып, 1 майға ярты йыллыҡ программаны тамамлау бурысын ҡуйҙы. Тау цехы эшселәре коллективе «Башзолото» тресы системаһындағы социалистик ярышта алған алдынғы урынды үҙендә һаҡлап ҡалдырыу өсөн ныҡышмалы көрәш алып бара. Цехтың алдынғы Алексеев, Сабиров сменалары үткән айҙарҙа стахановсы хеҙмәттен гүзәл өлгөләрен күрһәттеләр һәм хәҙер ҙә өлгөлө эшләйҙәр. Иптәш Ғайнетдинов сменаһы ла яҡшы эшләй.

Бында Белорет — Учалы араһында юғары вольтлы электр линияһы төҙөлөшө иң артта барған участкаларҙың береһе булып тора. Рудниктең горняктәре төҙөүселәргә был объекттарҙы тиҙерәк эксплоатацияға тапшырыуҙарына өлгәшеү тураһында бик урынлы талаптар ҡуйҙылар.

М. Хәйҙәров.

—☆—

Биш айлыҡ норма

ӨФӨ. Икенсе номерлы таҡта ярыу заводы коллективе валовой продукция эшләп сығарыу буйынса беренсе квартал планын 121,5 процентҡа үтәп, пландан тыш 1.800 фестметр таҡта, 57 мең һумлыҡ мебелдәр эшләп сығарҙы. Был кварталда өҫтәмә расходтарҙы ҡыҫҡартыу иҫәбенә 170 мең һумлыҡ доход алынды.

Коллектив байрам алды социалистик ярышына ҡушылып, 1 майға валовой продукция эшләп сығарыу буйынса 5 айлыҡ заданиене үтәргә, изделиеләр эшләп сығарыу буйынса материалдарға расходтарҙы 5 процентҡа кәметергә һәм 20 йәш эшсене һәр төрлө профессияға өйрәтергә тигән конкрет йөкләмә алды.

—☆—

Паровоздар ремонтлау заводында

Өфө паровоздар ремонтлау заводында 1 Майға әҙерлек көндән-көн киңәйә бара. Байрамға һигеҙ квартиралы яңы йорт эксплоатацияға тапшырыласаҡ. Завод эргәһендәге иң ҙур эшселәр торлағына капиталь ремонт үткәрелә.

Заводтың комсомол комитеты ҡарт кадровик эшселәр менән йәш эшселәрҙең осрашыу кисәләрен үткәрә башланы. Ҡарт эшселәр йәштәргә элек заводтағы ауыр тормош тураһында, паровоз ремонтлаусыларҙың 1917 йылғы Октябрь ваҡиғаларында ҡатнашыуҙары тураһында һөйләйҙәр.

Заводтың комсомолецтәре 1 Майға бүләк итеп пландан тыш бер паровозды йыйырға булдылар.

Комсомолецтәрҙең ярҙамы

Комсомолдың Бозаяз һәм Благовещен район комитеттәре колхоздарҙың яҙғы сәсеүгә әҙерлеген тикшереү буйынса комсомолецтәр һәм селькорҙар рейде үткәрҙе. Рейдтарҙа 260 кеше ҡатнашты. Улар колхозсыларға сәсеүгә әҙерлектәге етешһеҙлектәрҙе асырға һәм бөтөрөргә ярҙам иттеләр.

Комсомолец Куликов етәкселегендәге рейд бригадаһы Благовещен районының Крупская исемендәге колхозына ярыулыҡ ташыуҙы ойоштороҙо. Ике көндә колхоз ярыулыҡ менән тәьмин ителде. Димитров исемендәге колхоздың комсомолецтәре һыу баҫа торған урындан артелдең сәсеү осоронда файҙаланырға тейешле бесәнен ҡоро урынға ташып ҡуйҙылар.

Бозаяз районында ла бындай рейдтәр «Молот», Фрунзе һәм Жуков исемендәге колхоздарға сәсеүгә әҙерлектәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса практик ярҙам күрһәттеләр.

Баҫыу эштәре осоронда колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн был райондарҙың комсомол комитеттәре хәҙер бригадалар ойоштороҙолар.

—☆—

Киске партия мәктәбе асылды

ВКП(б)-ның Ҡариҙел район комитетенең парткабинете эргәһендә киске партия мәктәбе ойошторолдо. Мәктәптә партия һәм совет активтәренән 30 кеше уҡый.

Мәктәптә уҡыуҙар 1 апрелдән башланды. Бында күпселек лекцияларҙы райкомдың етәксе работниктәре алып баралар.

Уҡыуҙар йәнле һәм ҙур активлек менән үтә.

—☆—

Колхоз гидроэлектр станциялары өсөн турбиналар

Ағымдағы йылда Башҡортостан колхоздары колхоз гидроэлектр станциялары өсөн 45 турбина аласаҡ. 25 турбинаны Мәскәү һәм Свердловск заводтары, ҡалған өлөшөн республиканың үҙ предприятиелары әҙерләйәсәк.

—☆—

Квалификациялы 1240 эшсе

Стәрлетамаҡтың ФЗО мәктәбе үҙенең йәшәү осоронда бөтәһе 1.240 квалификациялы эшсе — столярҙар, слесарҙар, штукатурсылар әҙерләп сығарҙы.

—☆—

Заводтың ярҙамсы хужалығы

Өфөләге электротехника заводы ярҙамсы хужалығы уҙған йыл 100 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм йәшелсәләр сәскәйне. Быйыл ул сәсеү майҙанын 17 процентҡа киңәйтәсәк. Сәсеүгә орлоҡ етерлек әҙерләнгән һәм таҙартылып ҡуйылған. Трактор һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары тулыһынса ремонтланған.

Ярҙамсы хужалыҡта малсылыҡты үҫтереүгә лә ҙур иғтибар ителә. Хәҙер уның 100 баш мөгөҙлө эре малы, 12 аты һәм 138 баш сусҡаһы бар.

ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНЫУСЫ АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ

Е. И. Новикова — Маҡар районы «Восток» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,92-шәр центнер арыш урожайы алды.

Л. А. Леонтьева — Бәрә районы Базан МТС-ы директоры. МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынды.

С. М. Ишмөхәмәтова — Маҡар районы «Олҡар» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 9,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 33,1-әр центнер арыш урожайы алды.

М. С. Чумаков — Маҡар районы «Восток» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,85-шәр центнер арыш урожайы алды.

П. С. Исаҷкина — Маҡар районы «Олҡар» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 12 гектар майҙандан һәр гектарынан 31,35-шәр центнер арыш урожайы алды.

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Совете Президиумы УКАЗЫ

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордене менән

(Дауамы. Башы газетабыҙҙың 72-се номерендә).

15. Ғәйнислам Ғайнатулла улы Әлиевты — Дәүләкән районы «Бик-карамалы» колхозының бригадире, 19 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,37 центнер арыш урожайы алған өсөн.

16. Захар Андреевич Бабинде — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,5 центнер арыш урожайы алған өсөн.

17. Ғәзизә Байгилдинаны — Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 2 гектар майҙандың һәр гектарынан 611,5 центнер шәкәр сөгөлдөрө урожайы алынған.

18. Николай Васильевич Байковты — Дәүләкән районы «Кыҙыл Урал» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9,9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,93 центнер бойҙай урожайы алынған.

19. Шәрәфетдин Шагали улы Байковты — Бүҙәк районы «Сулпан» колхозы бригадире, 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,34 центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

20. Нина Васильевна Барабановаԥы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35 центнер арыш урожайы алынған.

21. Сәфәр Шәнгәрәй улы Башировты — Стәрлетамаҡ районы «Красный герой» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,57 центнер арыш урожайы алынған.

22. Емельян Семенович Блюхинде — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозы колхозсыһы, ул бригадала эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35 центнер арыш урожайы алынған.

23. Федот Васильевич Белобородовты — Бөрө районы Попов исемендәге колхоздың бригадире, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,4 центнер арыш урожайы алған өсөн.

24. Илья Иванович Бирюковты — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы бригадире, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,08 центнер арыш урожайы алған өсөн.

25. Мария Яковлевна Брыкинаны — ВКП(б)-ның Дәүләкән райкомы секретаре, үҙенең ҡатнашлығы менән район буйынса бойҙай һәм арыштың дөйөм урожайын алыу планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

26. Пелагея Васильевна Буториныны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,5 центнер арыш урожайы алынған.

27. Зөлҡәғиҙә Кәрим ҡыҙы Валиеваны — Балтач районы «1 май» колхозы звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,8 центнер арыш урожайы алған өсөн.

28. Мәүлилә Саит ҡыҙы Вәлиеваны — Яңауыл районы «Коммунар» колхозы звеноводы, 15 гектар майҙандың һәр гектарынан 20 центнер арыш урожайы алған өсөн.

29. Мөхәммәт Вәли улы Вәлиевте — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоз председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,9 центнер арыш урожайы алған өсөн.

30. Елена Николаевна Варламованы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 30 центнер арыш урожайы алынған.

31. Дмитрий Николаевич Васильковы — Дәүләкән МТС-ы комбайнере, МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53 центнер арыш урожайы алынған.

32. Духтар Ғәбделхаҡ ҡыҙы Вахитованы — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозы звеноводы, 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,28 центнер арыш урожайы алған өсөн.

33. Лаврентий Петрович Видинеевте — Туймазы районы Фрунзе исемендәге колхоздың бригадире, 42,8 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,3 центнер арыш урожайы алған өсөн.

34. Иван Федорович Винниченковы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозы колхозсыһы, бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 26 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,04 центнер арыш урожайы алынған.

35. Трофим Федосеевич Винокуровты — Маҡар районы «Восток» колхозы колхозсыһы, колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, унда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,23 центнер арыш урожайы алынған.

36. Зоя Федоровна Воронковааны — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы колхозсыһы, колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, унда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26 центнер арыш урожайы алынған.

37. Зәйнетдин Ғәйнетдин улы Ғәйнетдиновты — Бөрө районы «Сулпан» колхозы председателе, 82 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,17 центнер арыш урожайы алған өсөн.

38. Рәзиә Исмәғил ҡыҙы Галинаны — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоз звеноводы, 8,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,8 центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

39. Бибинур Әбүбәкер ҡыҙы Гәрәеваны — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозы звеноводы, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,01 центнер арыш урожайы алған өсөн.

40. Гәрәй Гәрәй улы Гәрәевте — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы, звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,9 центнер арыш урожайы алынған.

41 Сәлах Зәләй улы Ғимаевты — Дәүләкән МТС-ының участка агрономы, МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53 центнер арыш урожайы алынған.

42. Вәлиәхмәт Вильдан улы Ғирфановты — ВКП(б)-ның Дәүләкән райкомының бүлек мөдире, үҙенең ҡатнашлығы менән район буйынса бойҙай һәм арыш урожайы алыу планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

43. Иван Прохорович Глазковты — Дәүләкән районы «Парижская коммуна» колхозының председателе, 51 гектар майҙандың һәр гектарынан 20 центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

44. Макар Осипович Голковты — Бөрө районы «Урал» колхозы председателе, 45 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,1 центнер арыш урожайы алған өсөн.

45. Анна Андреевна Головининаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,8 центнер арыш урожайы алған өсөн.

46. Василий Михайлович Головинде — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы колхозсыһы, колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, унда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,4 центнер арыш урожайы алынған.

47. Федор Емельянович Гордеевте — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының тимерсеһе, ул колхоздағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

48. Илья Павлович Горячевте — Ҡалтасы районы «Союз» колхозының бригадиры, 31 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,4-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

49. Агафья Феоктистовна Гусеваны — Әбйәлил районы «Серп» колхозының звеноводы, 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,16-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

50. Миңлегәрәй Дәүләтша улы Дәүләтшинде — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының председателе, 60 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,67-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

51. Прасковья Акимовна Дерменеваны — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул бригадалағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригаданың участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

52. Федор Васильевич Десяткинде — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 21-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

53. Филипп Романович Десяткинде — Мишкә районы Чапаев исемендәге колхоздың звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,75-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

54. Галина Даниловна Дмитрачковаңы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул бригадалағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 26 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,04-әр центнер арыш урожайы алынған.

55. Ефим Никонорович Дойниковты — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы, ул звенолағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,3-әр центнер арыш урожайы алынған.

56. Татьяна Петровна Дороининаны — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы, ул звенолағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 12 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

57. Александр Максимович Дьяконовты — Базан МТС-ының участка агрономы, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

58. Степан Лаврентьевич Еловенковы — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 80 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,7-шәр центнер арыш урожайы алынған.

59. Николай Никонорович Ершовты — Базан МТС-ы тракторисе, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

60. Мария Васильевна Желобецкаяны — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул звенолағы эштә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

61. Федор Игнатьевич Зайкинде — Ауырғазы районы «Красный пахарь» колхозының бригадире, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,47-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

62. Хәмәдйәр Мәхәрәм улы Зәйләловты — Благовар районы «Һабансы» колхозының председателе, 67 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

63. Герасим Андреевич Зайцевте — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың председателе, 44 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,9-ар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

64. Рәфиғә Закир ҡыҙы Закированы — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,67-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

65. Әхмәтнур Әхмәтзариф улы Зариповты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың председателе, 40,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,04-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

66. Фәнә Латиф улы Зариповты — Дүртөйлө МТС-ы трактор бригадаһы бригадире, 154 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

67. Анна Владимировна Зеркаловаңы — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

68. Василий Дмитриевич Зоновты — Базан МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

69. Дмитрий Матвеевич Зоновты — Базан МТС-ы тракторисе, ул бригада эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 183 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,07-шәр центнер арыш урожайы алынған.

70. Фадей Филиппович Зоновты — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының бригадире, 22 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,8-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

71. Николай Григорьевич Зоринде — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, бригада эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 20,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,5-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

72. Усман Әхмәтсолтан улы Ибраһимовты — Дәүләкән район башҡарма комитете председателенең урынбаҫары, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай алыу планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

73. Хәмит Мөхәтғәти улы Ибраһимовты — Благовар МТС-ы трактор бригадаһының бригадире, 155 гектар майҙандың һәр гектарынан 19,5-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

74. Павел Матвеевич Ивановты — Дәүләкән МТС-ының шоферы, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

75. Идрис Ибраһим улы Илкинде — Дәүләкән районының район ауыл хужалығы бүлегенең өлкән землеустроителе, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай йыйнау планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

76. Николай Ильтыбаевич Ильтыбаевты — Базан МТС-ы тракторисе, МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер арыш урожайы алынған.

77. Шәрип Абдрахман улы Исергаковты — Благовар районы «Һабансы» колхозының бригадире, 67 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

78. Нурия Ғүмәр ҡыҙы Исчуринаны — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алынған.

79. Анна Ивановна Казаковаңы — Баҡалы районы «Красный Октябрь» колхозының звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,1-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

80. Мария Мартыяновна Казаковаңы — Баҡалы районы «Красный Октябрь» колхозының бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

81. Михаил Леонтьевич Казачекты — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының комсомол ойошмаһы секретаре, бригадала эшләп айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән өсөн, был бригада участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алған.

82. Степан Захарович Казаринде — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының агрономы, колхозда эшләгән ваҡытында айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкәне өсөн, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26-шар центнер арыш урожайы алынған.

83. Фәйзерахман Нәғим улы Кәлимуллинде — Маҡар районы «Үрнәк» колхозының звеноводы, 9,2 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,44-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

84. Максим Арсентьевич Кармановты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы, звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән өсөн, был звено участкаһында 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,97-шәр центнер бойҙай урожайы алынған.

85. Александр Федорович Климинде — Бөрө районы «Урал» колхозының бригадире, 23 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,7-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

86. Степан Ипполитович Климинде — Бөрө районы «Урал» колхозының бригадире, 22 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,4-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

87. Геннадий Васильевич Колонскихте — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының бригадире, 22 гектар майҙандың һәр гектарынан 21-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

88. Раиса Алексеевна Колосты — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы, бригадала эшләгәндә айырыуса уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

89. Григорий Георгеевич Колышевте — Базан МТС-ының участка агрономы, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

90. Прокопий Трофимович Комиссаровты — Базан МТС-ының машина-трактор мастерскойы мөдире, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

91. Яков Трофимович Комиссаровты — Базан МТС-ының трактор бригадаһы бригадире, 179 гектар майҙандың һәр гектарынан 19,7-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

92. Петр Гордеевич Кравченкоңы — Дәүләкән МТС-ы комбайнере, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53 центнер арыш урожайы алынған.

93. Андрей Егорович Краевты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының бригадире, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

94. Федор Алексеевич Красильниковты — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының бригадире, 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,9-ар центнер арыш урожайы алған өсөн.

95. Татьяна Григорьевна Кругляковаңы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 22-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

96. Зоя Ивановна Кудряшованы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 30-ар центнер арыш урожайы алынған.

97. Илларион Васильевич Кузнецовты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының тимерсеһе, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,02-шәр центнер арыш урожайы алынған.

98. Аген Захарович Купреевте — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,02-шәр центнер арыш урожайы алынған.

99. Николай Васильевич Лапоновты — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 24-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

100. Пелагия Васильевна Лапонованы — Дәүләкән районы район ауыл хужалығы бүлеге агрономы, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай алыу планын 25,8 процентҡа арттырып үтәүҙе тәьмин иткән өсөн.

101. Иван Александрович Ларинде — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының партия ойошмаһы секретаре, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26-шар центнер арыш урожайы алынған.

102. Григорий Яковлевич Левицкийҙе — Дәүләкән МТС-ы шоферы, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

103. Васена Елисеевна Левкинаны — Маҡар районы «Восток» колхозы колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,92-шәр центнер арыш урожайы алынған.

104. Михаил Васильевич Левкинде — Маҡар районы «Восток» колхозының партия ойошмаһы секретаре, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,23-әр центнер арыш урожайы алынған.

105. Николай Михайлович Левкинде — Маҡар районы «Восток» колхозы председателе, 42 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,23-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

106. Захар Калистратович Левченкоңы — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26-шар центнер арыш урожайы алынған.

107. Алексей Степанович Лильковты — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының председателе, 80 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,7-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

108. Анна Александровна Лильковаңы — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 12 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

109. Үзбәк Мәүлехан улы Мәүлехановты — Дәүләкән МТС-ы тракторисе, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

110. Мәүлет Мүбәрәк улы Мәғафуровты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алынған.

111. Михаил Федорович Максимовты — Дәүләкән МТС-ы эшсеһе, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

112. Максим Федорович Мамаевты — Туймазы районы Фрунзе исемендәге колхоздың председателе, 42,8 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,3-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

113. Нәсип Зиннәт улы Мамлиевте — Кушнаренко районы «Чатра» колхозы председателе, 58 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,37-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

114. Хәби Нәби улы Мамлиевте — Кушнаренко районы «Чатра» колхозының бригадире, 58 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,37-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

115. Фазлый Мансур улы Мансуровты — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының председателе, 52 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,88-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

116. Егор Иванович Матвеевте — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был колхоз 80 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,7-шәр центнер арыш урожайы алған.

117. Иван Андреевич Мешковты — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының бригадире, 61,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

118. Исхаҡ Миһман улы Миһмановты — Әбйәлил районы Салауат Юлай исемендәге колхоздың бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,17-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

119. Ғөбәй Фәттәх улы Мифтаховты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,04-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

120. Александр Иванович Морозовты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 22-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

121. Антонина Дмитриевна Москвинаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,2-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

122. Антонина Сергеевна Москвинаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,8-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

123. Екатерина Никифоровна Мосяковаңы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был звено участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған

(Дауамы 3-сө биттә).

Башкорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

(Дауамы).

124. Михаил Семенович Мосяковты — Дәүләкән МТС-ы тракторисе, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 150 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,4-әр центнер арыш урожайы алынған.

125. Хәниф Мөьмин улы Мөьминовты — Куштаренко районы «Коминтерн» колхозының бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,33-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

126. Рәхмә Солтангәрәй кыҙы Муллағәлиеваны — Дәүләкән районы «Кыҙыл Урал» колхозының колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9,9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,53-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

127. Мәжкай Морзабай улы Морзабаевты — Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың бригадире, 29 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,84-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

128. Сәйгәт Абдрахман улы Морзабахатовты — Баймак районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алынған.

129. Сание Якуп кыҙы Мерсәлимованы — Буздяк районы «Сулпан» колхозының звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,6-шар центнер арыш урожайы алған өсөн.

130. Хәтимә Мирьян кыҙы Мерсәлимованы — Буздяк районы «Сулпан» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

131. Набиулла Мусиндә — Баймак районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алынған.

132. Кали Мөхәммәт улы Мөхәмәтовты — Калтасы районы «Красный Таныл» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 43,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,4 центнер арыш урожайы алынған.

133. Анна Михайловна Некрасованы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

134. Иван Петрович Никоновты — Аслыкул МТС-ы тракторисе, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 150 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,1-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

135. Степан Игнатьевич Новиковты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

136. Анна Леонтьевна Ноздриваны — Кырмыҫкалы районы Чапаев исемендәге колхоздың звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,6-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

137. Мөнир Ибраһим улы Нуриевты — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының счетоводы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,4-әр центнер арыш урожайы алынған.

138. Иван Михайлович Овчаровты — Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоз звеноводы, 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,6-шар центнер арыш урожайы алған өсөн.

139. Семен Яковлевич Овчаровты — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, ул колхозда 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

140. Николай Яковлевич Овчаровты — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

141. Иван Васильевич Овчинниковты — Базан МТС-ы комбайнере, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

142. Александра Михайловна Павлованы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

143. Степан Анисимович Падалконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың бригадире, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,3-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

144. Степан Григорьевич Пахомовты — Дәүләкән МТС-ы тракторисе, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

145. Наталия Максимовна Пенкинаны — Благовещен районы «Буря» колхозының звеноводы, 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,54-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

146. Трофим Федорович Платоновты — Дәүләкән МТС-ының машина-трактор мастерскойы мөдире, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

147. Иван Абрамович Пойловты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 20,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,5-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

148. Андрушка Полатович Полатовты — Калтасы районы «Красный Таныл» колхозының бригадире, 18,2 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,38-әр центнер арыш урожайы алынған.

149. Павел Романович Полевте — Дәүләкән МТС-ы тракторисе, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

150. Елизавета Денисовна Поляковаиы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозы колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

151. Павел Александрович Поляковты — Дәүләкән районы «На страже» колхозы председателе, 42 гектар майҙандың һәр гектарынан 22-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

152. Мария Михайловна Пономареваны — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,43-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

153. Василий Федорович Правиковты — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының бригадире, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,45-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

154. Дмитрий Емельянович Примаковты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,37-шәр центнер арыш урожайы алынған.

155. Алексей Свиридович Проконенконы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул колхоз эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,02-шәр центнер арыш урожайы алынған.

156. Василий Иванович Прытковты — Дәүләкән районы «На страже» колхозының бригадире, 42 гектар майҙандың һәр гектарынан 22-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

157. Алексей Гигорьевич Ртищевте — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың бригадире, 26,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,6-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

158. Марфа Григорьевна Салеваны — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы, ул звено эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,85-әр центнер арыш урожайы алынған.

159. Самуил Афанасьевич Садовниковты — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының председателе, 61,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шар центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

160. Миңлегәли Тажетдин улы Садретдиновты — ВЛКСМ-дың Дәүләкән райкомы секретаре, үҙенең эше менән тотош район буйынса бойҙайҙан һәм арыштан урожай йыйнау планың 25,8 процентка арттырып үтәүҙе тәъмин иткәне өсөн.

161. Рәшиҙә Тимерхан кыҙы Садиковаиы — Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозы звеноводы, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,97-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

162. Захар Сәит улы Сәитовты — Базан МТС-ы тракторисе, ул бригада эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 183 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,07-шәр центнер арыш урожайы алынған.

163. Ризван Сәлимгәрәй улы Сәлимгәрәевте — Дәүләкән МТС-ы эшсеһе, ул МТС эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

164. Иван Яковлевич Самошинде — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозы колхозсыһы, ул бригада эшендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,6-шар центнер арыш урожайы алынған.

165. Павел Васильевич Самойловты — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың бригадире, 43,3 гектар майҙандың һәр гектарынан 24-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

166. Яков Прокопьевич Самойловты — Бөрө районы Берия исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,17-шәр центнер арыш урожайы алынған.

167. Шакирә Сәлимгәрәй кыҙы Саяповаиы — Куштаренко районы «Коминтерн» колхозының звеноводы, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,38-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

168. Александр Васильевич Селезневты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

169. Егор Никанорович Селивановты — Әбйәлил районы «Серп» колхозының бригадире, 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

170. Яков Иванович Семеновты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

171. Семен Васильевич Солнцевте — Кырмыҫкалы районы Чапаев исемендәге колхоздың бригадире, 19,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,5-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

172. Степан Никифорович Соломинде — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,6 центнер бойҙай урожайы алынған.

173. Иван Денисович Степаненконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоз председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 23,15-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

174. Федосья Ефимовна Стояновалы — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

175. Варвара Васильевна Стручковаиы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

176. Николай Кириллович Стручковты — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алынған.

177. Нотфулла Шаһим улы Сөләймановты — Баймаҡ районы «Ургазы» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

178. Евстафий Исаевич Сулимовты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 26 центнер бойҙай урожайы алынған.

179. Рәхим Әхмәтян улы Суфияновты — Дәүләкән район газетаһының редакторы, ул үҙенең ҡатнашлығы менән бойҙай һәм арыш урожайы алыу буйынса район планын 25,8 процентка арттырып үтәүҙе тәъмин иткән.

180. Самуил Федотович Тарасовты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,08 центнер арыш урожайы алынған.

181. Сажидә Мәгсум кыҙы Тимергәлиеваны — Янаул районы «Коммунар» колхозының звеноводы, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 22-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

182. Артемий Парфенович Тимофеевте — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,97-шәр центнер бойҙай урожайы алынған.

183. Ибраһим Ҡаһарман улы Уелдановты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоз председателе, 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

184. Фәтхулла Сабир улы Утарбаевте — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алынған.

185. Василий Михайлович Фадеевте — Дәүләкән МТС-ы механиге, МТС-та эшләгәндә ул айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

186. Илья Семенович Фадеевте — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоз председателе, 90 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,7 центнер арыш урожайы алған өсөн.

187. Пелагея Петровна Федорованы — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,5-әр центнер арыш урожайы алынған.

188. Зөлфиә Хәжи кыҙы Хәжиеваны — Балтач районы «1 май» колхозының звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,8-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

189. Насибулла Нурғәли улы Хәжиевте — Стәрлетамаҡ районы «Красный герой» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,57-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

190. Фагилә Шәйхелислам кыҙы Хәйруллинаны — Куштаренко районы «Коминтерн» колхозының звеноводы, 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,24-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

191. Мөхәммәт Хәким улы Хакимовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,9-ар центнер арыш урожайы алынған.

192. Фатима Хәсәнованы — Кырмыҫкалы районы «Иҙел» колхозы колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 2 гектар майҙандың һәр гектарынан 611,5-әр центнер шәкәр сөгөлдөрө урожайы алынған.

193. Хәнифә Хәсәнованы — Кырмыҫкалы районы «Иҙел» колхозының колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 2 гектар майҙандың һәр гектарынан 611,5-әр центнер шәкәр сөгөлдөрө урожайы алынған.

194. Хәмит Хәтмулла улы Хәтмуллинде — Калтасы районы «Красный Таныл» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 43,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,4-әр центнер арыш урожайы алынған.

195. Зөләйхә Хафиз кыҙы Хафизованы — Янаул районы «Коммунар» колхозының звеноводы, 12 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

196. Әсхәбьямал Хөсәйнованы — Кырмыҫкалы районы «Иҙел» колхозының колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 2 гектар майҙандың һәр гектарынан 611,5-шәр центнер шәкәр сөгөлдөрө урожайы алынған.

197. Клавдия Ивановна Чертыковцеваны — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозы агрономы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,4-әр центнер арыш урожайы алынған.

198. Александр Максимович Чудиновты — Базан МТС-ның баш бухгалтере, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,12-шәр центнер арыш урожайы алынған.

199. Андрей Иванович Чулоповты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 41 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,02-шәр центнер арыш урожайы алынған.

200. Михаил Егорович Шабельниковты — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың бригадире, 90 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,7-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

201. Рәйхана Ғәлимулла кыҙы Шәйхетдинованы — Янаул районы Сталин исемендәге колхоздың звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,05-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

202. Әми Шараф улы Шарафевты — Калтасы районы Крупская исемендәге колхоздың бригадире, 25 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,44-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

203. Фатима Ғәзизьян кыҙы Шәриповаиы — Кырмыҫкалы районы Чапаев исемендәге колхоздың звеноводы, 8,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,8-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

204. Рәшит Нәғим улы Шәфиковты — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың председателе, 43 гектар майҙандың һәр гектарынан 24,3-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

205. Виктор Иванович Шенгуровты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 26 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,04-әр центнер арыш урожайы алынған.

206. Александр Иванович Шестопаловты — Дәүләкән районы «1 май» колхозының тимерсеһе, ул колхозда эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был колхозда 40,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

207. Илья Ефимович Шестопаловты — Аслыкүл МТС-ының тракторисе, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән. Был бригада участкаһында 150 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,1-әр центнер бойҙай урожайы алынған.

208. Александра Кузьминична Шишминцеваны — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы, 81 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,71-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

209. Ольга Семеновна Шишминцеланы — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының бригадире, 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 23-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

210. Валентина Давыдовна Шуралеваны — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы, ул звенола эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был звено участкаһында 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,6-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

211. Зинаида Федоровна Шуралеваны — Дәүләкән МТС-ының токаре, ул МТС-та эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

212. Зәйләғи Нурулла улы Юнусовты — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының звеноводы, 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,01-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

213. Әһлетдин Миңһаж улы Йосоповты — Туймазы районы Шмидт исемендәге колхоздың председателе, 42 гектар майҙандың һәр гектарынан 23,33-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

214. Вера Сергеевна Яковлеваны — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,89-ар центнер арыш урожайы алынған.

215. Дарья Ефимовна Яковлеваны — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

216. Мария Сидоровна Яковлеваны — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы, ул бригадала эшләгәндә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшкән, был бригада участкаһында 28,1 гектар майҙандың һәр гектарынан 31,86-шар центнер бойҙай урожайы алынған.

217. Мәғафирә Хәйҙәр кыҙы Яҡуповаиы — Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозының звеноводы, 11,6 гектар майҙандың һәр гектарынан 23-әр центнер арыш урожайы алған өсөн.

218. Зиннур Ибраһим улы Ямалетдиновты — Кырмыҫкалы районы Чапаев исемендәге колхоздың бригадире, 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,5-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

219. Сәрбаш Илбарис улы Ямалетдиновты — Мишкә районы «Трактор» колхозының звеноводы, 12 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер арыш урожайы алған өсөн.

220. Аллабирҙе Хәким улы Яналинде — Баймаҡ районы «Ургазы» колхозының звеноводы, 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 21-әр центнер бойҙай урожайы алған өсөн.

221. Алексей Яковлевич Янкеевте — Бөрө районы «Сулпан» колхозы бригадире, 46,4 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,6-шар центнер арыш урожайы алған өсөн.

„Хеҙмәт батырлығы өсөн“ медале менән

1. Сәғидә Ғатаулхаҡ кыҙы Абдрахманованы — Маҡар районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.

2. Салима Мифтах кыҙы Әбдрәхимованы — Маҡар районы «Үрнәк» колхозы колхозсыһы.

3. Өрҡиә Ғәләметдин кыҙы Абзанованы — Баймаҡ районы Ходайбирҙин исемендәге колхоздың звеноводы.

4. Миңлеғәли Мирғәли улы Аблиевте — Благовар МТС-ының тракторисе.

5. Васса Кузьминична Аблицованы — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозы колхозсыһы.

6. Фаиз Дәүләтхан улы Адиевте — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

7. Елисей Михайлович Азановты — Әлмөхәмәт МТС-ының трактор бригадаһы бригадире.

8. Клавдия Григорьевна Алакаеваны — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

9. Анна Семеновна Александрованы — Бөрө районы Берия исемендәге колхоздың колхозсыһы.

10. Павел Федорович Александровты — Базан МТС-ының тракторисе.

11. Павел Николаевич Александровты — Базан МТС-ының тракторисе.

12. Матрена Тимофеевна Алешинскаяны — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.

13. Зөлҡарнай Ғелметдин улы Әлмитевте — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының звеноводы.

14. Ғиззетдин Әнүәр улы Әнүәровты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

15. Лидия Тихоновна Андрееваиы — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

(Дауамы бар).

Бөйөк рус драматургы А. Н. Островский

Бөйөк рус драматургы Александр Николаевич Островскийҙең тыуыуына 125 йыл тулды. Драматургияның Пушкине, «Фонвизин, Грибоедов, Гоголь тәүге нигеҙ таштарын һалған йортто бер үҙе төҙөп бөтөүсе» (И. Гончаров) был драматургтың тыуыу көнөн бөтә совет халҡы хөрмәт менән иҫкә ала. Совет халҡы өсөн А. Островскийҙың иҫтәлеге айырыуса ҡиммәт. Уның әҫәрҙәре «ҡараңғы батшалыҡты» асып күрһәтеүсе тарихи документ булыу менән бергә, беҙҙең йәш искусствобыҙҙы артабан үҫтереү, тулыландырыу юлында үлсәп бөтөрмәҫлек хеҙмәт итәләр.

Реакцион ҡарашлы тәнҡитселәр, рус буржуазияһы: «Купецтар тормошо үлде, Островский ҙә үлде...», тип бөйөк драматургты онотолоуға бирергә тырыштылар. Ләкин, Октябрь Социалистик революцияһынан һуң, ул совет ысынбарлығында яңы йәшәү тапты, әҫәрҙәре бөтә фашлаусы тарафлығында ҡабат яңғыраны. Әле 1923 йылда уҡ, драматургтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы үткәрелгән юбилейҙа, А. В. Луначарский: «Артҡа, Островскийға», тигән лозунг ташланы. Был, билдәле, артҡа саҡырыу түгел, ә яңы моронлаусы йәш искусствоны рус драматургияһының реализм, халҡыбыҙ традицияларына саҡырыу ине. Ошо ваҡыттан һуң Островский спектаклдәре... революцияға тиклемге интересы менән ҡайһы бер халҡтарҙың кәйефен табыу, уларҙы тыныслантырыу хеҙмәтенән ҡотҡарылып, яңыса яҡтыртыла башланылар. Островский пьесалары киң массаға эйә булды. Хәҙер уның ас тиҫтәнән артыҡ пьесаһы бөтә театрҙарҙа бара. Улар рус сәхнәһе менән генә сикләнмәй, 29 халҡ теленә күсерелде. Әгәр 1939 йылда ғына Островский әҫәрҙәре 2500 тапҡыр ҡуйылышын иҫкә алһаҡ, драматургтың халҡ ҡаршында ни тиклем иғтибар һәм мәхәббәт менән файҙаланыуын күҙ алдына килтереү ҡыйын түгел.

Рус халҡының культура тарихында Островскийҙең хеҙмәте, әлбиттә, театр тыуҙырыу менән генә сикләнмәй. «Ул ялған мәҙәниәттәрҙе, уларҙың бөтә эҙемтәләре менән, асыҡ картиналарҙа һүрәтләп, шулай уҡ яңы короллекка мятыштың тауышы булып яңғыраны» (Добролюбов). Ысынын әйткәндә, ул үҙе — «ҡараңғы батшалыҡта яҡтылыҡ нуры» ине. Дөрөҫ, Островский революцион демократ түгел. Уның геройҙары, «замандың рупоры булып», актив көрәшкә саҡырмайҙар. Ләкин ул либерал, хыялдарҙан да азат художник, хәҡиҡәт художнигы. Шул сәбәпле ул асып күрһәткән ерәнгес ысынбарлыҡ, кешеләрҙең хоҡуҡһыҙлыҡтары күренештәре, объектив рәүештә, тыңлаусыларҙа «ҡараңғы батшалыҡҡа» нәфрәт уята, яҡтылыҡҡа саҡырҙылар. Уның «Урман» комедияһының финалындағы Несчастливцев һүҙҙәрен генә алып ҡарайыҡ:

«— Бында, туған, бөтәһе лә, урмандағы кеүек, үҙ тәртибендә. Ҡарсыҡ гимназистҡа кейәүгә бара, йәш ҡыҙҙар үҙ туғандарының тормошонан әсенеп һыуға баталар... Юҡ, беҙ комедианттар түгел, беҙ саф күңелле артистар, ә комедианттар һеҙ ул. Беҙ һөйһәк икән, инде һөйәбеҙ; әгәр һөймәйбеҙ икән, талашабыҙ йәки һуғышабыҙ. Әгәр ярҙам итһәк, һуңғы хеҙмәт тиненә менән ярҙам итәбеҙ. Ә һеҙ? Бөтә ғүмерегеҙ буйы йәмғиәттең яҡшылығы турарында, кешелекте мәхәббәт турарында һөйләйһегеҙ. Ә нимә һуң һеҙ эшләнегеҙ? Кемде ашаттығыҙ? Кемде йыуаттығыҙ? Һеҙ үҙегеҙҙе генә үҙегеҙ йыуатаһығыҙ, үҙегеҙҙе генә күңелләндереүҙәгеҙ асайһығыҙ...»

Был һүҙҙәр, үҙ ваҡытында, «ҡараңғы батшалыҡтың» бүреләренә ғәйепләү акты булып яңғырамаһынмы ни? Билдәле, был шулай. Шуға күрә, А. Островский әҫәрҙәре батшалыҡ цензоры тарафынан ғүмер буйы эҙәрләнде; улар үҙ ваҡытында иркен сәхнә күрә алманылар, киҫәлделәр, «яраҡлаштырылдылар»... Был эҙәрләү драматург ҡәбергә кергәнсе һәм унан һуң да барҙы. Хатта, 1886 йыл — драматургтың әҫәби хеҙмәтенә ҡырҡ йыл тулыу көнөндә батша иҫемәнә бриллиант браслет бүләк итеү артынса уҡ, цензорҙар... авторҙың уның пьесаһын ҡуйыуҙы тыйыу турарындағы бойороҡто тапшыралар!

Билдәле, Островский сыбыртҡылаған дыуамалдарҙың типтары хәҙер беҙҙә юҡ. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, уның әҫәрҙәре үҙҙәренең хоҡуҡһыҙлыҡтарын фашлаусы әһәмиәтен юғалтмайҙар. Улар капиталистик илдәрҙә шул уҡ хоҡуҡһыҙлыҡтарҙың йәшәүен хәтерләтеп, нәфрәт уятыу менән бергә, аңында капитализм ҡалдыҡтарын йөрөткән ҡайһы бер артта ҡалған ҡараштар йөрөтөүселәргә лә һуғалар.

Ваҡытында А. Островский әҫәрҙәрендә рус сәхнәһенең, П. Садовский, А. Мартынов, П. Стрепетова, Г. Федотова, Ермолова кеүек, гүзәл артистары үҫһә, улар хәҙер ҙә беҙҙең талантлыларҙы тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнайҙар. Хәҙер Островский әҫәрҙәренең йоғонто майҙаны бигерәк тә киң. Уның әҫәрҙәре бөтә бер бөйөк рус халҡының ғына түгел, бөтә туғандаш милләттәрҙең уртаҡ байлығына әйләнде. Октябрь революцияһының балаһы — Башҡорт академия театры ла үҙенең беренсе аҙымдарын А. Островский әҫәрҙәре менән башланы. «Төшөмлө урын», «Ете юл сатлығында», «Гәйепһеҙ гәйеплеләр», «Бирнәһеҙ ҡыҙ» һәм башҡа пьесалар З. Бикбулатова, Б. Иосипова, А. Мөбәрәков, В. Ғәлимов, Ғ. Ҡарамышев, Р. Сыртланов кеүек талантлы артистарҙы тәрбиәләүҙә бик ҙур роль уйнанылар. Беҙҙең театрыбыҙҙың үҫешендә лә А. Островский әҫәрҙәре ҙур хеҙмәт иттеләр. Ул спектаклдәр театрҙы рус классикаһы традицияларына, яңы юғарылыҡҡа күтәрҙе, социалистик реализм алымдарын нығытты. Шулай уҡ, артыҡ йөҙ самаһы яҡшы сәхнә әҫәрҙәре биргән драматургтан беҙҙең яҙыусыларыбыҙ ҙа ҙур өйрәнәләр.

А. Н. Островскийҙың тыуған көнөн билдәләү — совет халҡының культура тормошонда ҙур ваҡиға ул. Был хәл бөйөк драматургтың әҫәби мираҫтарын тағы ла тәрәнерәк өйрәнеүгә, үҙләштереүгә һәм, һис шикһеҙ, культурабыҙҙы артабан күтәреүгә ҙур ярҙам итә һәм итасәк.

Баязит Бикбай.

Немец яҙыусыларының һәм культура деятелдәренең Мәскәүгә килеүе

Совет яҙыусылары Союзының саҡырыуы буйынса немец яҙыусыларының һәм культура деятелдәренең бер төркөмө Мәскәүгә килде.

Был төркөмгә түбәндәгеләр инә: Бернгард Келлерман катнаша менән, Анна Зегерс, Вольфганг Лангхоф, Юрген Кучинский, Стефан Хермлин, Эдуард Клаудиус, Гюнтер Вайзенборн, Михаэль Ческо, Генрик Эмзен, Вольфганг Харих.

Аэродромда ҡунаҡтарҙы совет яҙыусылары Союзының генераль секретаренең урынбаҫары К. Симонов, Б. Горбатов, К. Федин, Т. Мотылева, А. Лейтес, М. Аплетин ҡаршыланылар.

Ҡунаҡтар Мәскәүҙең һәм Ленинградтың культура учреждениеләре менән, шулай уҡ тарихи һәйкәлдәр менән танышасаҡтар. (ТАСС).

Пьетро Ненниҙең яраланыуы

РИМ, 6 апрель. (ТАСС). Анса агентствоһы 5 апрелдә кис автомобиль һәләкәте булды, Пьетро Ненни, Джулиано Пулит яраландылар, тип хәбәр итә. Политик деятелдәрҙең икеһе лә Катанияға килтерелеп, клиникаға урынлаштырылдылар.

Ике самолеттың һәләкәткә осрауы

БЕРЛИН, 6 апрель. (ТАСС). Кисә кондогта сәғәт иртәлә Берлин өҫтөндә Дальгоф аэродромы районында һауа һәләкәте булып, Совет самолеты «ЯК—3» ерға төшөп, өсөн аэродром өҫтөндә әйләнеп осҡан саҡта, Англияның пассажир самолеты «Виккерс-Викинг» болоттар араһынан килеп сығып, совет самолетының ҡойроғона һуғылды. Ике самолет та ватылды. Совет самолетының летчигы, шулай уҡ Англия самолетындағы экипаждың 4 кешеһе һәм 10 пассажир һәләк булды.

Италия хөкүмәтенең законһыҙ саралары

РИМ, 7 апрель. (ТАСС). Италия хөкүмәтенең официаль органы «Попало» газетаһы, һайлауҙар алдында тәртип һаҡлау өсөн полицияны һәм бөтә ҡораллы көстәрҙе лә әҙерләп, 400 меңгә яҡын кешене үҙ ҡарамағында тотасаҡ, тип белдерҙе. Политик кругтарҙа, хөкүмәттең официаль органы тарафынан иғлан ителгән был мәғлүмәттәр тыныслыҡ договоры шарттарына ҡаршы килә, тип һанайҙар. Тыныслыҡ договоры буйынса, Италиядағы ҡоралы көстәр һаны 300 мең кешенән артмаҫҡа тейеш.

РИМ, 7 апрель. (ТАСС). Билдәле булғанса, хөкүмәт Италияның һуңғы ситуацияһы менән бәйләп, ... майҙанына һайлауҙарға ... бирҙерелгән ... шарттарын бозоп, 1938 йылда 10 мартта ... тағы ... эшләндем ... һәм общественный фекерҙе бик шерел ...

Вварҙалағы ... тәрәнен ... талапты ... тарала ... хатсыла ...

Анса агентствоһының хәбәр итеүенсә, ҡарағанда, ... секретары депутат ... на министр ... менән ... итеп.

Иран Азербайжанындағы хәл турарында „Кийаме Иран" газетаһы

ТЕГЕРАН, 8 апрель. (ТАСС). Иран Азербайжанындағы хәлгә ҡағылып «Кияме Иран» газетаһы түбәндәгеләрҙе яҙа: «Иран Азербайжанында, уны «Ирандың Можино һыҙығы зонаһына» әйләндерергә теләйҙәр, тигән хәбәрҙәр йөрөй. Газета, ошо «Можино һыҙығын» тамамлау өсөн Азербайжандың күп кенә пункттарында аэродромдар төҙөлә башланы тип күрһәтә. Ошо аэродромдарҙың төҙөлөүен сит ил кешеләренән һаҡлар өсөн бик ҙур уйлап сығарыу эшләнә: урын һайлап алынғандан һуң, типографик схемалар эшләнгәндән һәм тейешле эштәр эшләнә башланғандан һуң аэродромды ул ярҡ булғансы ихлас төҙөп бөтөрәлмәгән килеш ҡалдырып китәләр.

Британия һәм Совет самолеттарының бәрелешеүҙәре турарында

Тикшереү комиссияһының белдереүе

БЕРЛИН, 7 апрель (ТАСС). Британия һәм Совет самолеттарының бәрелешеү хәлдәрен һәм сәбәптәрен тикшереү буйынса совет тикшереү комиссияһы түбәндәгеләрҙе билдәләне:

«1948 йылдың 5 апрелендә Берлин ваҡыты менән 13 сәғәт 57 минутта совет аэродромы Дальгоф өҫтөндә 410 метр бейеклектә Англияның пассажирҙар йөрөтөүсе ике моторлы «Виккерс—Викинг» тибындағы самолеты һауала Советтәр Союзының бер моторлы тренировка самолеты «Як—3» менән бәрелеште. Бәрелешеү һәҙәмтәһендә совет самолеты, Берлиндең Англия секторына, үҙенең аэродромынан 1500 метр алыҫлыҡта төштө. Самолет ватылды. Пелот һәләк булды. Англия самолеты Совет зонаһына, совет аэродромы Дальгоф зонаһының сигенә төштө. Самолет янды. Пассажирҙар һәм самолеттың экипажы һәләк булдылар. Бәрелешеү урынында тикшереү һәм бәрелешеүҙе үҙ күҙҙәре менән күреүсе кешеләрҙән һорашыу һөҙөмтәһендә түбәндәгеләр билдәләнде:

Самолеттар бәрелешкән моментта аэродром өҫтөндәге болоттарҙың бейеклеге 500—600 метр ине. Совет летчиге үҙ аэродромының түңәрәге буйынса 450 метр бейеклектә тренировка осошо үткәрә ине. Осоуын тамамлап, ул ергә төшә башланы. Был моментта совет аэродромы өҫтөндә болоттарҙан сығып Англияның самолеты түбәнәйә башланы. Англия самолеты үҙенең моторҙары менән совет самолетының ҡойроғона барып бәрелде һәм уны емерҙе. Совет самолеты үҙенең идара ителеүен юғалтты һәм ергә төшеп ватылды. Англия самолеты бәрелешеү һөҙөмтәһендә һауала янып китте һәм киҫәктәргә бүленә башлап идара ителмәгән килеш ергә төштө һәм бөтөнләй янды. Бәрелешеү сәбәптәре түбәндәгесә: Англия самолетының осоу ҡағиҙәләрен боҙоуы һәм болоттарҙы аша сығыуы, шулай уҡ Англия самолетының контроль совет эргәһендәге хәрби-һауа директоратына тарафынан 1946 йылдың 22 октябрендә раҫланған осоу ҡағиҙәләрен үтәмәүе. Бында, беренсе бүлектә, 3-сө параграфтың «Д» пунктында былай тип әйтелә: «Бер нисләй ҙә самолет, әгәр ҙә был аэродромға төшөү тейеш булмаһа, был аэродромдың зонаһына инергә тейеш түгел. Союзный государстволарҙың бер генә самолеты ла һауа иминселегенең Берлиндәге үҙәгенән (БЦВБ) алдан рөхсәт алмайынса торып, башҡа милләттең аэродромына 2.600 фут (800 метр) бейеклектән һәм кәмендә ике миль алыҫлыҡтан яҡынлашырға тейеш түгел.

Англия самолеты совет аэродромынан 0,5 миль алыҫлыҡтан һәм 400—500 метр бейеклектә болоттарҙан килеп сыҡҡан. 7-се параграфтың «б» пунктында былай тип әйтелә: «Аэродромға яҡынлашыусы самолеттар Берлин контроль зонаһынан (БКЗ) кәмендә 75 миль (120 километр) алыҫлыҡтан үҙҙәре төшә торған аэродром менән радио аша бәйләнешергә тейештәр. Был аэродром ошо турала һауа иминселегенең Берлиндәге үҙәгенә хәбәр итәсәк һәм һауа иминселегенең Берлиндәге үҙәге һауала хәрәкәт итеүгә рөхсәт һәм осоуҙарҙың иминселеге өсөн кәрәк буласаҡ башҡа информация һәм инструкциялар бирәсәк». Англия аэродромы Кладовтың администрацияһы был осоу турарында һауа иминселегенең Берлиндәге үҙәгенә алдан белдермәне һәм БЦВБ был турала совет аэродромының администрацияһына хәбәр итеү яһаманы.

Бәрелешеүҙең айырым деталдәрен тамам асыҡлау өсөн ҡатнаш англия-совет комиссияһын булдырырға кәрәк.

Англияның Германиялағы оккупацион көстәре командующие генерал Робертсон Англия һәм Совет самолеттарының бәрелешеүҙәре айҡанлы 5 апрелдә кисәттә Англияның транспорт самолеттары Берлингә осҡан ваҡытта истребителдәр оҙатыуында барыу осорға тейешлектәре турарында приказ бирҙе. Дальгоф аэродромы районында бәхетһеҙ ваҡиға булыу айҡанлы совет ағымындағы белдереүҙәр яһалғандан һуң, транспорт самолеттарын һаҡлау өсөн истребителдәрҙе файҙаланыу турарында Робертсондың приказы юҡҡа сығарылды. Ҡатнаш Совет—Англия комиссияһы совет аэродромы Дальгоф районындағы бәрелешеү ваҡиғаларын тикшерә башланы.

Италия колонияларына ҡарата һөйләшеүҙәр турарында „Республика" газетаһы

РИМ, 7 апрель. (ТАСС). «Республика» газетаһы Лондондан алынған хәбәрҙе иғлан итте. Бында түбәндәгеләр әйтелә: Англия сит ил эштәре министерствоһына бик яҡын булған кругтарҙа билдәле булғанынса, 16 февралдә министр Бевин АҠШ-тың государство департаментенә, Англия Ливия өҫтөнән опекаға мандат талап итергә уйлай, тип белдергән һәм АҠШ был талапты яҡларға әҙерме, тип һораған. Государство департаменте үҙенең яуабында Бевинга, әгәр ҙә АҠШ күптән түгел Триполитанияла һәм Киренаикала алған хәрби базаларын үҙендә һаҡлап ҡалдырһа, Великобританияның талабын яҡларға әҙер икәнлеге турарында белдергән. Бер үк ваҡытта АҠШ Великобританияға общественный фекер алдында христиан демократик партияның һәм хөкүмәткә инеүсе партияларҙың позицияларын йомшартмаҫ өсөн үҙенең талабын 18 апрелгә тиклем официаль рәүештә ҡуймаҫҡа тәҡдим яһаған. Быңдай аҙым Триест турарындағы декларация тарафынан өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе туранан-тура юҡ итә һәм һуңғы ваҡытта Италияға ҡарата союзниктар тарафынан күрһәтелгән дуҫлыҡтың һайлау алды характерында булыуын асыҡлай алыр ине.

Американың ризалығына өлгәшеп, Бевин 26 февралдә Ноэль Чарлзе Парижға ебәреҙе һәм уға Францияны Италия өсөн уңайлы позицияһынан баш тартырға ышандырырға тырышып ҡарарға ҡушты. Был дипломат Бидоға, әгәр ҙә Франция был тәҡдимде ҡабул итһә, ул саҡта Англия хөкүмәте Францияның илдәре лигаһы Алжирҙең, Тунистең һәм Марокконың бойондороҡһоҙлоғо өсөн хәрәкәтте хупламаҫҡа күндереү өсөн мөмкин булған бөтә нәмәне эшләйәсәк, тип вәғәҙә иткән. Бынан башҡа Англия хөкүмәте Алжир менән Ливия араһындағы сикте үҙгәртеүгә ризалашыр ине. Быны Франция талап итә.

Ноэль Чарлз, государство департаменте быңың менән ризаһында һәм Америка хөкүмәте сит мәсьәлә буйынса Италиялағы һайлауҙарҙан һуң официаль белдереү яһаясаҡ, тип Бидоға аңлатты. Бидо Ноэль Чарлзға үҙенең был тәҡдимде нигеҙҙә ҡабул итеүе турарында белдерҙе.

Яуаплы редактор урынбаҫары
З. Ю. ВАХИТОВ.

Баҫыуға һынау сығышы үткәрелде

Маҡар районының «Ҡыҙыл таң» колхозында ошо көндәрҙә баҫыуға һынау сығышы ойошторолдо. Был көндә колхоздың быйылғы яҙғы баҫыу эшендә ҡатнаша торған бөтә көсө хәрәкәткә килтерелде. Һабандарға егелгән аттар, саналарға тейәлгән тырмалар бөтәһе лә сафҡа теҙелделәр.

Махсус комиссия һынау сығышын ентекләп тикшерҙе. Колхоздың тимерсеһе Лашев ремонтлаған 25 һабан, 27 пар тырма һәм 3 сәскес, З. Мырҙағолов һәм Б. Байдәүләтов яһаған арбалар, сбруйҙар, Ғ. Кәлимов, З. Муллагилдин һәм А. Бигулов тәрбиәләгән аттар — бөтәһе лә колхоздың сәсеүгә тулыһынса әҙер икәнлеген күрһәттеләр.

С. Сәйфуллин.

Агрономдар кәңәшмәһе

Ошо көндәрҙә Салауат район Советының ауыл хужалығы бүлеге МТС агрономдарының сәсеү алды кәңәшмәһен үткәрҙе.

Кәңәшмәлә колхоздарҙа дөрөҫ сәсеү әйләнеше индереү, бригадаларҙа, звеноларҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, һабан ашлығын һәм ужымдарҙы ашламалауҙы агротехника фәне талап иткәнсә үткәреү мәсьәләләре ҡаралды. Бөтә тикшерелгән мәсьәләләр буйынса ла конкрет саралар билдәләнде. Кәңәшмәлә ҡатнашыусы агрономдар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Малаев МТС-ы агрономдары 6 колхозда юғары урожай звенолары ойоштороу һәм уларҙың эштәрендә практик ярҙам күрһәтеү буйынса йөкләмәләр алдылар һәм Арҡауыл машина-трактор станцияһын ярышҡа саҡырҙылар.

Ҡала хеҙмәтсәндәренә индивидуаль баҡсасылыҡ эшендә ярҙам итергә

Үҙған йыл ҡалала 69 мең кеше 3.516 гектар йәшелсә, картуф, ҡуҙаҡлы культуралар сәскәйне. Баҡсасылар ерҙе яҡшы эшләү һәм сифатлы орлоҡтар ултыртыу һөҙөмтәһендә юғары урожай алыуға ирештеләр. Мәҫәлән, директоры иптәш Советов булған завод, тау оборудованиеләре, яҙыу машиналары заводы коллективтәре, аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһының коллективе һәм башҡалар картуфтың гектарынан 10-16 тонна, йәшелсәнең гектарынан 11—12 тонна, ҡуҙаҡлы культураларҙың гектарынан 7—10 центнер урожай йыйҙанылар.

Баҡсасылыҡ эше ҡаланың завод, фабрика һәм башҡа учреждениеларында эшләгән эшселәр, хеҙмәткәрҙәр коллективтәре араһындағы кеүек үк, райсобестар эргәһендәге инвалидтар, фронтта һәләк булған воиндарҙың семьялары араһында ла ныҡ йәйелгән.

Ағымдағы йылда Өфө хеҙмәтсәндәренең индивидуаль баҡсасылығын арттырыу һәм урожайлылыҡты артабан күтәреү мәсьәләһендә мөһим бурыстар тора. Шуға күрә Өфө ҡала Советының ауыл хужалығы бүлеге, баҡсасыларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеү һәм уларҙың агротехник белемдәрен күтәреү эшен алып бара торған даими эшләүсе комиссия төҙөнө. Был комиссияның председателе итеп Ауыл хужалығы институтының директоры иптәш Рудько билдәләнде. Комиссияның эшендә ауыл хужалығы институтының профессорҙары, уҡытыусылары һәм студенттәре актив ҡатнашалар.

Шул уҡ ваҡытта, ағымдағы йылда баҡсасылыҡ эшен, башҡа йылларға ҡарағанда, юғары кимәлгә күтәреү өсөн ҡала Советының ауыл хужалығы бүлеге ҡаладағы бөтә коллективтәрҙең сәсеүгә әҙерлектәрен, баҡсасыларҙың һанын ҡайтанан иҫәпкә алыу, орлоҡ фондтарын һәм сорттарын тикшереү үткәрҙе.

Быйыл баҡсасыларҙың һаны 80 меңгә етәсәк. Сәсеү майҙаны 5 мең гектарҙан арта. Баҡсасыларҙы яҡшы сортлы йәшелсә орлоҡтары менән тәьмин итеү өсөн сауҙа ойошмалары етерлек күләмдә орлоҡ әҙерләнеләр.

Орлоҡ әҙерләү буйынса баҡсасылар араһында массовый эш алып барыуҙа бигерәк тә завком председателе Закиров, Чепыжников иптәштәр булған заводтар коллективтәре өлгөлө эшләйҙәр. Улар орлоҡ менән 100 процентҡа тәьмин ителгәндәр.

1948 йылдың 19 мартында ВЦСПС президиумы профсоюз ойошмаларының хеҙмәтсәндәр, инвалидтар, һуғышта һәләк булған воиндарҙың семьялары араһында баҡсасылыҡты артабан үҫтереү һәм урожайҙы күтәреүҙә алып барған эштәрен тикшереп, байтаҡ мөһим саралар күреү турарында ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙа ағымдағы йылда баҡсасыларҙың һанын арттырыу, бигерәк тә инвалидтарға яҡын урындарҙан яҡшы ер участкалары бүлеп биреү, ерҙе аҡлау өсөн ашламалар табыуҙа ярҙам күрһәтеү турарында профсоюз ойошмаларына тәҡдим ителә.

Ләкин әле байтаҡ профсоюз ойошмалары был турала массовый эште йәйелдермәгәндәр. Шулай уҡ ҡарарҙа күрһәтелгән 1 апрелгә хеҙмәтсәндәргә баҡса участкаларын билдәләү турарындағы пункт та үтәлмәгән. Шуның өсөн ВЦСПС-тың ҡарарын үтәү тантәләндә, бөтә профсоюз ойошмаларына ла, һис кисекмәҫтән, эшкә тотонорға кәрәк. Ағымдағы йылда хеҙмәтсәндәрҙең айырым һәм коллектив баҡсасылыҡ эшен уңышлы үтәү — һәр бер профсоюз ойошмаһының ҙур бурысы булып тора.

Рахман Кәли.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башгос академ драм театрында — көндөҙ — «ХӘЖИ ӘФӘНДЕ ӨЙЛӘНӘ».
кис — «ДЕВОН».
Көндөҙгө спектакль 12 сәғәттә, киске спектакль 8 сәғәттә башлана.
12/IV — «БИРНӘҺЕҘ ҠЫҘ».

Башгосфилармонияла — Куйбышев госфилармонияһы артистәре кесе менән келкә йырҙар һәм бейеүҙәр кисәһе. Киске 9 сәғәттә башлана.

«Салауатта» — ГЕОРГИЙ СААКАДЗЕ.

Матросов исемендәге кинола — «КОНЕК-ГОРБУНОК» — Алейников, Ковалева һәм башҡа артистар ҡатнашлығында.

Өфө ҡалаһындағы цемент-силикат комбинаты массовый рәүештә арматуралы тимербетонлы плиталар һәм башҡа төрлө төҙөлөш деталдәре эшләп сығара башланы, һәм комбинат заказ биреүселәрҙең арматураларын менән заказ ҡабул итә.
Мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө, Силикат урамы 2-се номерле йорт.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 01665. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРЗЕҢ ПРОЛЕТАРИЙЗАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө кала Советы органы.

29-сы йыл сыға

№ 74
1948 йыл
13
апрель
шишәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАССР Министрҙәр Советендә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетендә. Республика промышленность предприятиеләренең март айында социалистик ярыш йомғаҡтары. (1-се бит).

Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдерәйек! Республиканың бөтә йәштәренә Башҡортостан йәш нефтселәренең мөрәжәғәте. (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (2—3-сө биттәр).

М. Сәғәдиева. — Киров районы партия активе йыйылышы. (3-сө бит).

Ғ. Әхмәтшин, Ғ. Идрисов. — Социалистик Хеҙмәт Геройы Тихон Алехин. (3-сө бит).

С. Мәүлютов. — Сауҙа ойошмаларында большевистик тәртип урынлаштырырға. (4-се бит).

Гәрәй Әмир. — Яңы коллектив договор актив рәүештә тикшерелде. (4-се бит).

Колумбиялағы ваҡиғалар. (4-се бит).

Юғары урожай мастерҙәренең тәжрибәләрен киң пропагандаларға

Республикабыҙҙың социалистик ауыл хужалығы эшсәндәре ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары менән ҡоралланып, ауыл хужалығын артабан күтәреү өсөн фиҙакәр көрәштең һөҙөмтәһендә уҙған йылда ҙур уңыштарға өлгәштеләр.

«Бөйөк маҡсаттар ғына бөйөк энергия тыуҙыра» ти иптәш Сталин. Социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү, Ватаныбыҙҙың экономик ҡеүәтен тағы ла нығытыу, илебеҙҙә коммунизмдең еңеүен яҡынайтыу өсөн бөтә көстәрен биреп, үҙ-үҙҙәрен аямайынса эшләүсе республикабыҙҙың игенселәре араһында һоҡланғыс батырҙар — Социалистик Хеҙмәт Геройҙары тыуҙы. 1947 йылда юғары урожай алғандары өсөн СССР Верховный Советы Президиумы Указдары менән республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларынан 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, 793 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының өлгәшкән гүзәл уңыштары бөтә игенселәрҙе лә һоҡландыра. Дәүләкән районының «1 май» колхозы бригадиры Александр Васильевич Стоянов иптәш 28,1 гектар майҙандан һәр гектарҙан 31,86 центнер бойҙай урожайы алды. Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозының звеноводы Банат Батырова иптәш 2 гектар шәкәр сөгөлдөрө майҙанының һәр гектарынан 611,5 центнер урожай үҫтерҙе.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының һәм наградланған юғары урожай мастерҙәренең уңыштары ауыл хужалығының бөтә эшсәндәрен — колхозсыларҙы, МТС һәм совхоз механизаторҙарын, ауыл хужалығы специалистарын яңы еңеүҙәр өсөн көрәшкә рухландыра.

СССР Верховный Советы Президиумы Указына яуап итеп республикабыҙҙың бөтә райондарында ла игенселәр араһында ғәйәт ҙур политик активлек һәм хеҙмәт күтәрелеше тыуҙы. Йөҙҙәрләгән колхоздар, меңәрләгән бригадалар, звенолар юғары урожай үҫтереү өсөн конкрет йөкләмәләр алалар. Социалистик Хеҙмәт Геройҙары менән типлөшер өсөн көрәшкә сығалар, уларҙың тәжрибәләрен ентекләп өйрәнәләр.

Юғары урожай мастерҙәренең эшендәге уңыштарҙың сере шунда, улар игенселектә алдынғы агрономик фән һәм юғары техника нигеҙендә ойошторалар, хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт итәләр. Улар ауыл хужалығы эштәренең бөтә осоронда ла алдынғы агротехниканы киң рәүештә ҡулланылар. Ул ғына ла түгел, юғары урожай мастерҙәре агрономия фәненең ҡаҙаныштарын урындағы шарттарға ҡарап ҡуллана белеүҙә новаторлыҡ күрһәттеләр. Алдынғы бригадирҙар, звеноводтар фиҙакәр хеҙмәт юл өсөн, Ватан өсөн героик подвиг икәнен аңланылар һәм бөтә эште социалистик ярыш нигеҙендә ойоштороп, бригада һәм звено члендәре араһында даими хеҙмәт энтузиазмы тыуҙыра алдылар.

Ябай игенселәрҙең бындай уңышы тик беҙҙең Совет илендә генә, ауыл хужалығының социалистик системаһы шарттарында ғына булыуы мөмкин. Сөнки беҙҙә большевиктәр партияһы колхоз крәҫтиәндәрен, МТС һәм совхоз хеҙмәтсәндәрен ауыл хужалығын ҡыҫҡа срокта аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү өсөн көрәшкә рухландыра һәм ойоштора. Совет Хөкүмәте социалистик ауыл хужалығын бөтә кәрәкле машиналар һәм ашламалар менән тәьмин итә.

Юғары урожай мастерҙәре алдынғы агрономия фәненең өлгәшеүҙәрен ҡулланып, үҙҙәренең новаторлыҡ эштәре менән практикала социалистик игенселектең нигеҙен һалалар. Шуның өсөн уларҙың ҡиммәтле тәжрибәләре киң пропагандаланырға тейеш. Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының, наградланған алдынғы колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың һәм ауыл хужалығы специалистарының тәжрибәләрен бөтә игенселәргә еткереү — ауыл партия ойошмаларының, ауыл хужалығы работниктарының һәм специалистарының иң мөһим, беренсе дәрәжәләге бурыстары булып тора.

Республикабыҙ яҙғы сәсеү эштәрен башлау алдында тора. Быйылғы яҙғы сәсеү эштәре сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылында тағы ла юғарыраҡ урожай алыуға нигеҙ һаласаҡ. Шуның өсөн дә алдынғыларҙың тәжрибәһен ентекләп өйрәнергә, уны колхозсыларҙың киң массаһы араһында пропагандаларға, бөтә ауыл хужалығы эштәрен алдынғылар тәжрибәһендә ойошторорға кәрәк. Агрономдар, механизаторҙар, ауыл хужалығы специалистары агротехник пропаганда эшен алып барғанда юғары урожай мастерҙәренең эш өлгөләрен, тәжрибәләрен киң файҙаланырға тейештәр.

Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, наградланған алдынғылар үҙҙәре иң яҡшы пропагандистар. ВКП(б) райкомдары, ауыл хужалығы органдары юғары урожай мастерҙәренең эш тәжрибәләрен йомғаҡларға уларға ярҙам итергә, ауыл эшсәндәре араһында уларҙың сығыштарын ойошторорға бурыслылар. Башҡа бригадалар һәм звенолар өҫтөнән юғары урожай мастерҙәренең шефлығын ойоштороу маҡсатҡа ярашлы буласаҡ. Район газеталары юғары урожай мастерҙәренең тәжрибәләрен систематик рәүештә яҡтыртырға, газета биттәрендә уларҙың сығыштарын ойошторорға тейештәр.

Бөтә колхоз крәҫтиәндәре, МТС һәм совхоз эшселәре юғары урожай өсөн көрәште үҙҙәренең иң беренсе бурысы итеп һанайҙар. Юғары урожай өсөн һөжүмдең фронты көндән-көн киңәйә, был көрәштең батырҙары өҙлөкһөҙ арта. Алдынғыларҙың бай тәжрибәһен пропагандалау һәм уны киң ҡулланыу социалистик ауыл хужалығының ҡеүәтле рәүештә алға китеүен тәьмин итәсәк. Юғары урожай мастерҙәренең тәжрибәләре бөтә игенселәрҙеке булырға тейеш.

БАССР Министрҙәр Советендә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетендә

РЕСПУБЛИКА ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРЕНЕҢ МАРТ АЙЫНДА СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ ЙОМҒАҠТАРЫ

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республика промышленность предприятиеләренең март айында ярыш йөкләмәләрен үтәү йомғаҡтарын ҡарап, агрегат заводын (директоры иптәш В. П. Советов, партбюро секретары иптәш В. Ф. Журавлев, завком председателе иптәш Б. Р. Солуянов) ярышта еңеүсе итеп тапты һәм уға БАССР Министрҙәр Советының, ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бирергә ҡарар иттеләр. Был күсмә Ҡыҙыл Байраҡ заводҡа «Ишембайнефть» тресынан алып бирелә.

«Туймазынефть» тресының, Өфө паровоздар ремонтлау заводының, тау оборудованиеләре заводының, Өфө фанера комбинатының, электро оборудованиеһе, Благовещен нефть оборудованиеһе эшләү заводтарының, Өфө кала тимер юлының, беренсе номерлы ТЭЦ-тең һәм радиомеханик заводтың март айында яҡшы эшләүҙәре билдәләнде.

РЕСПУБЛИКАЛАҒЫ ТӨҘӨЛӨШ ОЙОШМАЛАРЫНЫҢ МАРТ АЙЫНДА СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ ЙОМҒАҠТАРЫ

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республикалағы төҙөлөш ойошмаларының март айындағы эш йомғаҡтарын ҡарап, Черниковскиҙағы төҙөлөш тресын (управляющийы иптәш М. М. Башилов, партия ойошмаһы секретары иптәш Б. Н. Селиевский, постройком председателе иптәш И. К. Нугер) ярышта еңеүсе тип таптылар һәм БАССР Министрҙәр Советының, ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тресҡа ҡалдырырға ҡарар иттеләр.

БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһе предприятиеләренең март айында яҡшы эшләүҙәре—кирбес, алибастр һәм эзбиз эшләү пландарын арттырып үтәүҙәре билдәләнеп үтелде.

Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдерәйек!

РЕСПУБЛИКАНЫҢ БӨТӘ ЙӘШТӘРЕНӘ

Башҡортостан йәш нефтселәренең

МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Ҡәҙерле иптәштәр!

Беҙҙең Тыуған илебеҙ ҙур производство күтәрелеше менән солғап алынған. Данлыҡлы ленинградлылар саҡырыуы буйынса илебеҙҙә сталинсе яңы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярыш башланды.

Бөйөк Сталин күрһәтмәһе буйынса барлыҡҡа килтерелгән «Икенсе Баку»ҙың алдынғы районы — Башҡортостан нефтселәре, бөтә совет халҡы менән берлектә, биш йыллыҡты срогынан алда үтәү өсөн үҙ-үҙҙәрен аямай эшләйҙәр.

Һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хаттарында Башҡортостан нефтселәренең коллективтары республиканың нефть биш йыллығын срогынан бер йыл алда үтәргә һүҙ бирҙеләр.

Совет тыуған иленең нефть ресурстарын арттырыу теләге менән рухланған йәштәр ҙә, бөтә нефтсе коллективтар менән берлектә, фиҙакәр хеҙмәт һалалар.

Сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында Советтар Союзының йәштәре Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығын билдәләйҙәр.

Беҙ, икенсе республикан слетта ҡатнашыусы Башҡортостан йәш нефтселәре ВЛКСМ-дың 30 йыллығын производствола яңы еңеүҙәр менән билдәләргә ҡарар иттек һәм түбәндәге йөкләмәләрҙе алдыҡ:

1. Социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдереү юлы менән һәр бер йәш нефтсе, һәр бер йәштәр бригадаһы үҙенең йыллыҡ нормаһын ВЛКСМ-дың 30 йыллығы көнөнә үтәргә йөкләмә ала. Һәр бер йәш нефтсе үҙенең йөкләмәһен үтәп, нефть промышленносендәге һәр бер предприятие коллективе тарафынан биш йыллыҡтың өсөнсө йылы планын арттырып үтәүҙә булышлыҡ итәсәк.

2. Ишембай нефть промыселдәрендә эшләмәй ултырған һәм аҙ дебетле 70 скважинаны комсомолецтар һәм йәштәр көсө менән аяҡҡа баҫтырырға.

3. Электр энергияһына, материалдарға экономия өсөн, оборудованиеләрҙе, инструменттарҙе һаҡлыҡ менән тотоноу өсөн, хужалыҡ иҫәбе индереү өсөн көрәште киң йәйелдерергә, һәр тонна нефть һәм бензиндең үҙенә төшөү хаҡын планда билдәләнгәндән 5 процентҡа кәметергә.

4. Күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу, рационализация һәм уйлап сығарыу, эш көнөн тығыҙлау юлы менән —һәр бер промыселда, һәр бер бригадала һәм предприятиела, 1947 йыл менән сағыштырып алғанда, хеҙмәт етештереүсәнлеген 15 процентҡа күтәрергә.

5. Беҙ, йәш нефтселәр, дөйөм белемебеҙҙе һәм производство квалификациябыҙҙы күтәреү юлында систематик эшләүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ, тип иҫәпләйбеҙ. Йәштәрҙе кискө мәктәптәрҙә, техминимум түңәрәктәрендә, стахановсылар мәктәбендә массовый рәүештә уҡытыуҙы ойоштороу юлы менән 1948 йыл аҙағына һәр бер йәш эшсенең квалификацияһын ярты разрядҡа күтәреүгә өлгәшергә.

6. Үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе яҡшыраҡ файҙаланыу иҫәбенә ауыл хужалығына ярҙамды көсәйтергә, ауыл хужалығы буйынса бөтә заказдарҙың срогынан алда үтәлеүенә өлгәшергә, МТС һәм колхоздар өсөн пландан тыш запас частәр һәм инструменттар әҙерләүҙе ойошторорға, ауылда культура-ағартыу эштәрен ойоштороуҙа актив ҡатнашырға.

Беҙ, йәш нефтселәрҙең икенсе республикан слетының делегаттары, Башҡортостан нефть промышленносенең йәш эшселәре исеменән республикабыҙҙың бөтә йәш эшселәренә, колхозсыларға, мәктәп, техникум уҡыусыларына, юғары уҡыу йорттарының студенттәренә мөрәжәғәт итәбеҙ һәм Бөтә Союз Ленинсе Коммунистик йәштәр союзының 30 йыллығын достойн ҡаршылауға, был юбилейҙе коммунизм төҙөлөшөнөң бөтә участкаларында йәштәрҙең яңы данлы эштәре менән билдәләргә саҡырабыҙ.

Йәш эшселәр һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙар! ВЛКСМ-дың утыҙ йыллығын достойн ҡаршылау өсөн социалистик ярышҡа ҡушылығыҙ, предприятиеләрҙең рентабелле эшләүе өсөн, сырьеға, материалдарға, электр энергияһына экономия яһау өсөн, оборудованиеләргә һаҡлыҡ менән мөнәсәбәт итеү өсөн арымай-талмай көрәшегеҙ. Яңы техниканы тиҙерәк үҙләштерегеҙ һәм производствоға индерегеҙ хеҙмәттең алдынғы методтарына эйә булығыҙ, рационализаторҙарҙың һәм уйлап сығарыусыларҙың алдынғы сафында булығыҙ.

Ленин—Сталин комсомолының данлыҡлы юбилейен һәр бер йәш эшсе тарафынан һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылы планын срогынан алда үтәү һәм Тыуған илебеҙгә пландан тыш продукция — бүләк биреү менән билдәләйек.

Йәш колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, комбайнерҙар һәм трактористар, совхоздарҙың йәш эшселәре!

Яҙғы сәсеүгә әҙерлектә һәм уны үткәреүҙә иң актив ҡатнашығыҙ, колхоз һәм совхоз баҫлыҡтарынан юғары урожай алыу өсөн, общественный малсылыҡты үҫтереү һәм уның продуктивлеген күтәреү пландарын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн көрәшегеҙ.

Бөтә ауыл хужалығы эштәрен уңышлы үткәреү өсөн, комсомолдың данлыҡлы юбилейе көнөнә колхоздарҙың, совхоз һәм МТС-тарҙың бөтә пландарын һәм государство алдындағы йөкләмәләрен срогынан алда үтәү өсөн көрәшегеҙ.

Совет учреждениеләренең комсомолецтары һәм йәштәре!

Совет учреждениеләренең эштәрен яҡшыртыуға өлгәшегеҙ, хеҙмәтсәндәрҙең ихтыяждарын һәм һорауҙарын ҡәнәғәтләндереү менән бәйләнешле булған мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә иғтибарлы булығыҙ.

Мәктәп, техникум, юғары уҡыу йорттарының уҡыусылары!

Белемде тағы ла ҙур ныҡышмалылыҡ менән үҙләштерегеҙ, алдынғы совет фәненең һәм техникаһының данлыҡлы традицияларын достоин дауам иттереүселәр булыуға әҙерләнегеҙ. Экзамендарҙы уңышлы тапшырыу һәм яңы уҡыу йылын ойошҡан рәүештә башлау социалистик Тыуған илгә һеҙҙең бүләгегеҙ булып торор.

Һәр бер комсомолец, ҡалаларҙың һәм ауылдарҙың һәр бер егете һәм ҡыҙы комсомолдың 30 йыллығы көнөнә үҙенең эшендә күренекле йомғаҡ менән килһен.

Большевиктәр партияһы тарафынан рухландырылған һәм юнәлеш бирелгән беҙҙең йәштәребеҙ, бөтә совет халҡы менән берлектә Сталинсе юл менән ышаныслы рәүештә алға бара.

Коммунистик партия — беҙҙең туған әсәбеҙ. Беҙ йәш быуындар, үҙебеҙҙең бөгөнгө бәхетле йәшлегебеҙ, үҙебеҙҙең шатлығыбыҙ өсөн уға бурыслыбыҙ һәм иртәгәге бәхетле йәшлегебеҙ өсөн уға тағы ла күберәк бурыслыбыҙ.

Большевиктәр партияһы халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙә гигант эштәр алып бара. Был эштәрҙә тоғро һәм ышаныслы ярҙамсы булайыҡ. Беҙҙең өсөн Ленин—Сталин байрағы аҫтында алға барыусы коммунизм төҙөүселәрҙең бөйөк армияһы кешеһе булыуҙан да юғары бәхет юҡ.

Йәшәһен совет халҡының етәксе һәм юнәлеш биреүсе көсө—героик большевиктәр партияһы!

Йәшәһен беҙҙең атайыбыҙ, остазыбыҙ һәм аҡыллы юлбашсыбыҙ бөйөк Сталин!

Мөрәжәғәт Башҡортостан йәш нефтселәренең икенсе слетында ҡабул ителде.

Стахановсы токарь Морозов

1947 йыл ине. Киң күкрәкле, таҙа кәүҙәле етте заводтың ремонт цехына токарь итеп алдылар. Ул армияла хеҙмәт иткән сағында уҡ өйрәнгән был һөнәрҙәге эшкә ҡулдарын менән ҡыуанды. Эшкә башланы һәм бик тиҙ арала төшөнөп алды. Таныш булған станоктар һөнәрле егеттең ҡулында юғары етештереүсәнлеккә ҡарала әүерелделәр. Уның ҡулынан төрлө деталдар береһе артынан икенсеһе ҡойған кеүек эшләнеп сығып торҙолар.

Намыҫлы хеҙмәт Дмитрий Иванович Морозовҡа стахановсы тигән данлы исем килтерҙе. Ул Стәрлетамаҡ ҡалаһындағы Ленин исемендәге машиналар төҙөү заводының алдынғы эшселәре сафына тиңләште.

— Көнөнә 5 — 6 төрлө деталь эшләргә тура килә. Шулай ҙа нормамды 200 проценттан да кәмгә үтәгәнем юҡ әле, ти ул.

Стахановсы токарь Морозов ошо йылдың тәүге өс айы эсендә 6 айлыҡ норма бирҙе. Май алды ярышына ҡушылып, ул апрелдә заданиене 3 тапҡырға арттырып үтәү өсөн көрәшә.

Ғ. Ҡотлобаев.

ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ

Н. С. Үҙәнбаева — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алды.

М. С. Ивушкина — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 29,44-әр центнер арыш урожайы алды.

Ф. Ф. Самойлов — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,26-шар центнер арыш урожайы алды.

М. А. Алферова — Баймаҡ районы Каганович исемендәге колхоздың звеноводы. Уның звеноһы 10 гектар майҙандың һәр гектарынан 31-әр центнер арыш урожайы алды.

М. З. Заһирова — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы. Уның звеноһы 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,9-ар центнер арыш урожайы алды.

Пландан тыш 115 центнер балыҡ

Башҡортостан «Рыбтресы»на ҡараған Дүртөйлө, Краснокам Кушнаренко һәм Өфө балыҡ заводтарының коллективтары беренсе кварталда балыҡ тотоу планын арттырып үтәнеләр. Улар пландан тыш 115 центнер балыҡ тоттолар.

Өфө балыҡ заводы квартал планын айырыуса ҙур уңыштар менән тамамланы. Ул пландан тыш 47 центнер балыҡ тотто. Был коллектив май алды ярышына ҡушылып, апрель айында пландан тыш 50 центнер балыҡ тоторға йөкләмә алды һәм башҡа завод коллективтарын үҙе менән ярышҡа саҡырҙы.

Кушнаренко районының «Ҡыҙыл байраҡ» һәм Чапаев исемендәге колхоздарының балыҡсылыҡ бригадалары беренсе кварталда икенсе квартал иҫәбенә 12 центнер балыҡ тоттолар.

Киң ҡулланыу тауарҙары

«Башметаллопромсоюздың» күп кенә артелдәре ошо йылдың беренсе кварталында байтаҡ ҡына яңы төр киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙеләр. Өфөләге «Металлист», «Аккумулятор «Игрушка» артелдәрендә аллюмин һауыт-һабалар, гармондар, көрәктәр һәм төрлө йәҙәктәр массовый рәүештә эшләп сығарыла башланы.

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы ла байтаҡ кәметелде. Мәҫәлән, уҙған йылдың декабрендә цинк күнәктәрҙең хаҡы 70 һум булһа, хәҙер улар 44 һум, етеле кәрәсин лампаһы элек 20 һум 50 тин булған булһа, хәҙер 10 һум 50 тин тора.

Ағымдағы йылда бындай киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыу, уҙған йылға ҡарағанда, 20 процентҡа артасаҡ.

Яңы төҙөлөштәр

БАЙМАҠ. Һуғыштан һуңғы яңы биш йыллыҡта районда ҙур төҙөлөштәр планлаштырылған.

1948 йылда Баймаҡта Советтар йорто һәм крәҫтиәндәр йорто, төҙөү эштәре башлана.

Быйыл Баймаҡ ҡалаһында коммуналь торлаҡтарҙы ремонтлау өсөн урындағы бюджеттән 40 мең һум һәм өлкә бюджеттән 37 мең һум аҡса тотоласаҡ. Ремонт сезонына әҙерлектә ҡала коммуналь-хужалыҡ ойошмалары социалистик ярышты йәйелдерҙеләр.

Өршәк йылғаһында электр станцияһы

ДӘҮЛӘКӘН. Өршәк йылғаһында Мерәс гидроэлектр станцияһы һалыу планлаштырылды. Был станция «Мерәс», «Өршәк», «Сталинец» һәм Степан Разин исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндерәсәк. Хәҙер төҙөлөш өсөн 130 кубометр ағас ҡиҫелеп, ташылды.

Башкорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Совете Президиумы

УКАЗЫ

„Хезмәт батырлығы өсөн" медале менән

(Дауамы. Башы газетабыҙҙың 72, 73-сө номерҙарында).

16. Мария Зиновьевна Андрусенконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.

17. Екатерина Андреевна Ануфриеваны — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

18. Муллағәли Арслан улы Арслановты—Балтач районы «1 май» колхозының председателе.

19. Гәрфә Хәйрулла ҡыҙы Асланваны—Бүздәк районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

20. Мөхәммәтхан Хафиз улы Атнағуловты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

21. Нагила Ҡорбан ҡыҙы Әхмәеваны — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

22. Ибраһим Хәйрулла улы Әхмәровты — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

23. Закир Әхмәт улы Әхмәтовты — Туймазы районы Шмидт исемендәге колхоздың колхозсыһы.

24. Ибраһим Әхтәм улы Әхтәмовты — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының агрономы.

25. Ғәлиә Әюп ҡыҙы Әюповаһы — Мәсетле районы Маркс исемендәге колхоздың звеноводы.

26. Анна Семеновна Бабинаны— Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

27. Пайкә Байғужа улы Байғужинде — Яңауыл районы Чкалов исемендәге колхоздың председателе.

28. Иван Байдуған улы Байдуғановты—Ҡалтасы районы Крупская исемендәге колхоздың колхозсыһы.

29. Рәхимә Мөгин ҡыҙы Байковаһы — Благовар МТС-ының тракторисҡаһы.

30. Ғибат Йософ улы Баймөхәмәтовты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.

31. Питка Байрам улы Байраковты — Ҡалтасы районы «Красный Таньп» колхозының колхозсыһы.

32. Мария Михайловна Балыковаһы — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

33. Анна Тимофеевна Белобородоваһы—Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

34. Борис Гаврилович Богомоловты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

35. Николай Александрович Богомоловты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

36. Хәмит Зариф улы Бойковты — Благовар районы «Һабансы» колхозының бригадире.

37. Марфа Захаровна Борисоваһы — Әбйәлил районы «Серп» колхозының звеноводы.

38. София Алексеевна Бортниковаһы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

39. Наталия Никоноровна Босоваһы — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

40. Прасковья Егоровна Босоваһы — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

41. Надежда Васильевна Бочковаһы — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

42. Фәхрислам Борһан улы Борһановты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

43. Өрхәлбаян Бәдретдин улы Вәлиевте — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

44. Имаммөхәммәт Вәлинур улы Вәлинуровты—Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

45. Иман Васюткин улы Васюткинде — Ҡалтасы районы «Красный Таньп» колхозының колхозсыһы.

46. Николай Семенович Винокуровты — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының бригадире.

47. Анастасия Петровна Власоваһы — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

48. Михаил Антонович Волковты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

49. Николай Иванович Воронцовты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

50. Анастасия Васильевна Выдриһаны — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

51. Малик Ғәбдерәхим улы Ғәбдрәхимовты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

52. Харис Ғәбдрахман улы Ғәбдрәхмановты — Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозының колхозсыһы.

53. Иван Николаевич Гавриловты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының партия ойошмаһы секретаре.

54. Ғатаулла Шаһивәли улы Ғәделшинде—Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың комсомол ойошмаһы секретаре.

55. Евгений Абрамович Галактионовты—Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

56. Евдокия Евдокимовна Галактионоваһы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

57. Сәхибъямал Нигмәтьян ҡыҙы Ғәлиеваны — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

58. Мостафа Ғәләүетдин улы Ғәләүтдиновты — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

59. Надежда Павловна Герасимоваһы — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының колхозсыһы.

60. Тәғзимә Ғиззәтулла ҡыҙы Ғиззәтоваһы — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының звеноводы.

61. Хөрмәй Ғиззәт улы Ғиззәтовты — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.

62. Мәдинә Фәхерраз ҡыҙы Ғүмәроваһы — Баймаҡ районы «Урғаза» колхозының колхозсыһы.

63. Степан Михайлович Гурьевте — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

64. Ғәрайша Дәүләтша улы Дәүләтшинде—Яңауыл районы «Коммунар» колхозының тимерсеһе.

65. Рәсим Ҡасим улы Дәүләтовты — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.

66. Шәрифулла Дауыт улы Даутовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

67. Матрена Афанасьевна Дементьеваны — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

68. Леонтий Петрович Денисовты — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

69. Анна Павловна Дмитрачковаһы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

70. Николай Степанович Дорошевте — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының колхозсыһы.

71. Маврa Ермолаевна Дьяконоваһы — Бөрө районы Горький исемендәге колхоздың колхозсыһы.

72. Егор Борисович Дюлдинде—Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

73. Михаил Иванович Евстифеевте — Дәүләкән районы «На страже» колхозының колхозсыһы.

74. Павел Федотович Елисеевте — Өфө районы «Парижская коммуна» колхозының бригадире.

75. Мария Николаевна Еловенкоһы — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.

76. Мария Васильевна Елохинаны — Яңауыл районы «Искра» колхозының бригадире.

77. Антонида Петровна Ереминаны — Бәҡалы районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.

78. Мария Максимовна Ермиловаһы — Әбйәлил районы «Серп» колхозының звеноводы.

79. Николай Михайлович Желобецкийҙе — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

80. Дмитрий Иванович Заболовскийҙе — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

81. Павел Петрович Заболовскийҙе — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

82. Иван Павлович Заварихинде — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.

83. Рәүилә Зайит ҡыҙы Зайнитоваһы—Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

84. Евдокия Дмитриевна Зайкинаны — Ауырғазы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы.

85. Закарйә Байбулат улы Зайлаловты — Благовар МТС-ының тракторисе.

86. Мәниә Хажи ҡыҙы Зайнакаеваны — Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.

87. Миннулла Дәүләтгәрәй улы Зайнуллинде — Благовар МТС-ының тракторисе.

88. Трофим Андреевич Зайцевте — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

89. Кәрим Закир улы Закировты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

90. Зәйнәп Имам ҡыҙы Зәләеваны — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

91. Кирилл Сафронович Захаровты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

92. Александр Федорович Земляковты—Әбйәлил районы «Серп» колхозының бригадире.

93. Малика Нури ҡыҙы Зиһаншинаны — Мәсетле районы Маркс исемендәге колхоздың звеноводы.

94. Фрол Васильевич Зиминде—Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың бригадире.

95. Василий Аксентьевич Зоновты — Бөрө районы Попов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

96. Федор Григорьевич Зоринде — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

97. Игнат Павлович Зубаревте —Дәүләкән МТС-ының тракторисе.

98. Рәис Мәғсүм улы Зәфәровты — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

99. Хәлим Ғәни улы Ибраһимовты — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.

100. Павел Евстафьевич Ивановты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

101. Федор Кириллович Ивушкинде — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.

102. Милай Ильтубаевич Ильтубаевты— Ҡалтасы районы «Красный Таньп» колхозы колхозсыһы.

103. Александра Степановна Исачкинаны—Маҡар районы «Өлкәр» колхозы колхозсыһы.

104. Варвара Ефимовна Исачкинаны — Маҡар районы «Өлкәр» колхозы колхозсыһы.

105. Федор Тимофеевич Исачкинде — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының партия ойошмаһы секретаре.

106. Ғәли Ислам улы Исламовты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

107. Зәйтүнә Ғафур ҡыҙы Исламоваһы — Балтач районы «1 май» колхозының звеноводы.

108. Насип Фәйзулла улы Ишмөратовты — Стәрлетамаҡ районы «Красный герой» колхозының колхозсыһы.

109. Антонида Николаевна Казаковаһы—Бәҡалы районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.

110. Илья Христафорович Казарминковты — Әбйәлил районы «Серп» колхозының председателе.

111. Ҡамали Ҡамалтдин улы Камалитдиновты — Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.

112. Николай Кандровты—Дәүләкән МТС-ы комбайнеры.

113. Мөхәмәт Рамазан улы Карамурзинде — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.

114. Василий Зотович Кардапольцевте — Благовещен районы «Буря» колхозының председателе.

115. Александра Ивановна Карповаһы — Дәүләкән районы район ауыл хужалығы бүлеге агрономы.

116. Яков Артемьевич Катковты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

117. Мәғүрә Кәшәп ҡыҙы Кашаповаһы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.

118. Даниил Иванович Квашнинде — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

119. Ғәзелбану Кидрәсоваһы — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

120. Александр Илюкпаевич Килинбаевты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

121. Петр Иванович Кирсановты — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

122. Никита Филиппович Киселевте — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.

123. Василий Васильевич Колонскихты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

124. Иван Спиридонович Комаровты — Бөрө районы Попов исемендәге колхоздың бригадире.

125. Елизавета Семеновна Кондратьеваны — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

126. Антонина Андреевна Косихинаны — Бөрө районы Берия исемендәге колхоздың колхозсыһы.

127. Петр Гордеевич Кремешныйҙы — Стәрлетамаҡ МТС-ының трактор бригадаһы бригадире.

128. Александра Матвеевна Кривошееваны — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

129. Любовь Ивановна Кругляктe — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

130. Гөлнафис Нигмәтьян ҡыҙы Кулашеваны — Бүздәк районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

131. Степан Васильевич Кудряшевте — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

132. Анна Степановна Кузнецоваһы—Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоздың колхозсыһы.

133. Варвара Николаевна Кузнецоваһы — Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоздың колхозсыһы.

134. Екатерина Михайловна Кузнецоваһы—Әбйәлил районы Сталин исемендәге колхоздың звеноводы.

135. Зоя Васильевна Кузнецоваһы — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

136. Николай Родионович Кузнецовты — Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоздың бригадире.

137. Михаил Александрович Кузнецовты — Базан МТС-ының ҡатмарлы молотилка машинисе.

138. Ефим Иванович Кузьменкоһы — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы колхозсыһы.

139. Екатерина Александровна Кузьмичеваны — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозы колхозсыһы.

140. Иван Борисович Купреевте — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

141. Евдокия Макаровна Куприковаһы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

142. Зот Филатович Кургаевты— Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

143. Александр Алексеевич Курниковты — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

144. Иван Матвеевич Курниковты — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

145. Герасим Емельянович Кучеренкоһы — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының колхозсыһы.

146. Лидия Григорьевна Кучминаны — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

147. Анна Петровна Ларинаны— Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының колхозсыһы.

148. Елена Ивановна Ларинаны — Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының колхозсыһы.

149. Иван Ильич Лебедевте — Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

150. Степан Викторович Левкинде—Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

151. Екатерина Гавриловна Леготаны — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

152. Прасковья Кирилловна Леонтьеваны — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың звеноводы.

153. Дария Александровна Логиноваһы—Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.

154. Агафия Андреевна Макухаһы — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың звеноводы.

155. Иван Константинович Макушевте — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

156. Александр Михайлович Маловты—Бәҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

157. Петр Емельянович Мамаевты — Базан МТС-ы тракторисе.

158. Әкрам Ғиниәт улы Мамлиевте—Кушнаренко районы «Чатра» колхозының колхозсыһы.

159. Мансур Сәғәдәт улы Мамлиевте — Кушнаренко районы «Чатра» колхозының колхозсыһы.

160. Мәзһәр Вәлиулла улы Мамлиевте—Кушнаренко районы «Чатра» колхозының колхозсыһы.

161. Александр Петрович Матвеенкоһы — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

162. Елена Ивановна Машкинаны — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы.

163. Мария Осиповна Машковаһы — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.

164. Сәрмкәй Миңлекәй улы Миңликаевты—Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

165. Иһиниә Низам ҡыҙы Минһажоваһы—Яңауыл районы «Коммунар» колхозының звеноводы.

166. Анатолий Григорьевич Морозовты—Ҡалтасы районы «Союз» колхозының колхозсыһы.

167. Юрий Иосифович Морозовты—Ҡалтасы районы «Союз» колхозының колхозсыһы.

168. Әдһәм Мәхмүт улы Морататовты—Кушнаренко районы «Чатра» колхозының колхозсыһы.

169. Яҡуб Муллаян улы Мөрсәлимовты — Бүздәк районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

170. Фәниә Мирҙән ҡыҙы Мөрсәлимоваһы—Бүздәк районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

171. Мәрйәм Һади ҡыҙы Мусинаны — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

172. Гөлсәм Сахи ҡыҙы Мостаҡимоваһы — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

173. Биләл Һибәт улы Мостафинде—Баймаҡ районы «Урғаза» колхозының колхозсыһы.

174. Маҡһылыу Хәким ҡыҙы Мостафинаны — Баймаҡ районы «Урғаза» колхозының колхозсыһы.

175. Сорур Әүхәт ҡыҙы Мостафинаны — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

176. Кәримә Мөхәмәтшакир ҡыҙы Мөхәмәдиеваны — Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозының колхозсыһы.

177. Мәрйәм Ахун ҡыҙы Мөхәмәдиеваны — Мәсетле районы Маркс исемендәге колхоздың звеноводы.

178. Мөбәрәк Ниғмәтьян улы Нагаевты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың тимерсеһе.

179. Алексей Михайлович Нагайцевте—Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

180. Тимерхан Кәшәп улы Нәғимовты — Туймазы районы «Бүләктау» колхозының колхозсыһы.

181. Таисия Семеновна Надееваны — Благовещен районы «Буря» колхозының колхозсыһы.

182. Шамил Сәйфулла улы Насибуллинде—Туймазы районы «Бүләк-тау» колхозының колхозсыһы.

183. Мәрйәм Сәлим ҡыҙы Ниғамоваһы — Маҡар районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.

184. Флида Салихъян ҡыҙы Низакаеваны — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

185. Курхонф Нобей улы Нобеевте — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының бригадире.

186. Анна Андреевна Новиковаһы — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

187. Федор Андреевич Новиковты — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

188. Сәитғәли Нурғәли улы Нурғәлиевте — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

189. Ғәбдрахман Нурислам улы Нурисламовты — Яңауыл районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

190. Мөнәүәрә Ғәлихан ҡыҙы Нуриеваны — Балтач районы «1 май» колхозының звеноводы.

191. Усман Нурәхмәт улы Нурәхмәтовты — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының звеноводы.

192. Тәнбә Закир ҡыҙы Нуруллинаны — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозының звеноводы.

193. Хафиз Нурулла улы Нуруллинде — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозының звеноводы.

194. Григорий Иванович Овчаровты — Дәүләкән районы Париж коммунаһы исемендәге колхоздың колхозсыһы.

195. Егор Григорьевич Овчинниковты — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

196. Николай Филиппович Овчинниковты — Базан МТС-ының механиге.

197. Ефросинья Ивановна Паладконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.

198. Анна Семеновна Парахинаны — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

199. Сергей Андреевич Парахинде — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

200. Григорий Иванович Пастуховты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

201. Клавдия Ивановна Пензинаны — Бөрө районы Горький исемендәге колхоздың колхозсыһы.

202. Леонид Васильевич Пензинде — Базан МТС-ының слесаре.

203. Роман Иванович Пенкинде —Благовещен районы «Буря» колхозының бригадире.

204. Михаил Кузьмич Пестовты — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

205. Нина Федоровна Пестоваһы — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

206. Данил Евстафьевич Петровты—Базан МТС-ының эшсеһе.

207. Прасковья Васильевна Платоноваһы — Ауырғазы районы «Красный пахарь» колхозының звеноводы.

208. Нина Кузьминична Подприхинаны — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

209. Таисия Тимофеевна Попковаһы — Мишкә районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

210. Александр Федорович Поповты — Бөрө районы Попов исемендәге колхоздың председателе.

211. Егор Михайлович Поречныйҙы—Аслыкүл МТС-ының тракторисе.

212. Иван Федорович Поречныйҙы — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы.

213. Николай Филиппович Порозовты — Яңауыл районы Свердлов исемендәге колхоздың бригадире.

214. Павел Дмитриевич Примаковты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы.

215. Прасковья Михайловна Прозороваһы — Благовещен районы «Буря» колхозының звеноводы.

216. Петр Александрович Проломовты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

217. Агафия Филипповна Пупышеваһы — Благовещен районы «Буря» колхозының колхозсыһы.

218. Григорий Игнатьевич Пучковты — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

219. Ибәт Рафил улы Рәүиловты —Дүртөйлө МТС-ының тракторисе.

220. Бари Асылғужа улы Рәсуловты — Баймаҡ районы «Урғаза» колхозының колхозсыһы.

221. Идрис Ғәзиз улы Рәхмәтуллинде — Маҡар районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.

222. Михаил Павлович Резановты — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

223. Анна Михайловна Решетниковаһы—Туймазы районы Фрунзе исемендәге колхоздың колхозсыһы.

224. Василий Александрович Решетниковты — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

225. Иван Петрович Ртищевте—Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

226. Мария Алексеевна Ртищеваны — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

227. Арсений Алексеевич Рудаковты — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

228. Алексей Федорович Рудницкийҙе — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

229. Лукерия Федоровна Рябухинаны —Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

230. Мария Никитьевна Рябухинаны — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

231. Хадиса Садиковаһы—Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

232. Чачканай Сайтаевна Сайтаеваны—Ҡалтасы районы Крупская исемендәге колхоздың колхозсыһы.

233. Зайканай Саләевич Саләевты — Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.

234. Нигмәтьян Нуриман улы Сәлиховты — Туймазы районы Шмидт исемендәге колхоздың колхозсыһы.

235. Нина Ивановна Самойловаһы — Дәүләкән районы Париж коммунаһы исемендәге колхоздың колхозсыһы.

236. Александр Семенович Сандаловты—Ҡалтасы районы «Алга» колхозының бригадире.

237. Тимер Хәмитәфа улы Сафинде — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

238. Фәйзәгөл Сафи ҡыҙы Сафинаны — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

239. Василий Егорович Селивановты — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.

(Дауамы 3-сө биттә).

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы

УКАЗЫ

(Дауамы).

240. Евдокия Васильевна Семенованы — Туймазы районы Фрунзе исемендәге колхоздың колхозсыһы.

241. Мария Егоровна Семенованы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

242. Сергей Нестерович Сергейчукты — Дәүләкән районы «Победа» колхозының колхозсыһы.

243. Иван Гурьянович Серебренниковты — Бөрө районы «13 Октябрь» колхозының звеноводы.

244. Татьяна Сергеевна Сидоренте—Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.

245. Егор Андреевич Сизовты—Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.

246. Любовь Андреевна Сирните — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.

247. Хәмәтдин Ситдик улы Ситдиковты — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

248. Татьяна Ивановна Смирнованы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

249. Михаил Андреевич Соловьевты—Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының колхозсыһы.

250. Иван Федотович Соломатинте — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

251. Прасковья Ивановна Солопатинаны — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

252. Владимир Александрович Солохты — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

253. Александр Порфирьевич Степановты — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың председателе.

254. Ольга Прохоровна Стибуновны — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

255. Анастасия Николаевна Стручкованы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы.

256. Анна Михеевна Стручкованы — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы.

257. Тимофей Митрофанович Стручковты — Дәүләкән МТС-ының тракторисе.

258. Парфен Иванович Ступинде — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

259. Степан Харламович Ступинде — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

260. Галия Лотфулла ҡыҙы Сөләймановаға — Баймаҡ районы «Ураҙа» колхозының колхозсыһы.

261. Мәрйәм Арслан ҡыҙы Солтановаға — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.

262. Парусь Султановна Султанованы—Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.

263. Байрас Хәйрулла улы Таштимеровты — Баймаҡ районы «Ураҙа» колхозының колхозсыһы.

264. Андрей Евсеевич Тимофеевте — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

265. Владимир Сергеевич Титовты — Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының колхозсыһы.

266. Сергей Ильич Титовты — Дәүләкән МТС-ының тракторисе.

267. Иәүһәр Ризуан ҡыҙы Тохбатуллинаны — Мәсетле районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.

268. Евлампий Иванович Тучинде — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.

269. Миңнулла Ахун улы Уразметовты — Благовар районы «Һабансы» колхозының бригадиры.

270. Кәрим Усман улы Усмановты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

271. Ғәтифә Усманованы — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

272. Ғәлдәскәр Усман улы Усмановты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

273. Николай Петрович Ушаковты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы.

274. Фәниҙә Фәйзер ҡыҙы Файзерованы — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

275. Мөнәүәрә Фәрхулла ҡыҙы Фәрхуллинаны — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы.

276. Кашифә Фасай ҡыҙы Фасаеваны — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың звеноводы.

277. Нурый Хисмәтулла улы Фәтхуллинде — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

278. Мадыхат Фәялтдиновты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

279. Фәрей Фәялтдинович Фәялтдиновты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

280. Сергей Александрович Федоровты — Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.

281. Елена Николаевна Филимоновны — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының звеноводы.

282. Вәли Хажимәрдән улы Хажимәрдановты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

283. Хәби Хажнахмәт улы Хажимәрдановты — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

284. Миңдәүләт Хәмәди улы Хәмәдиевте — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

285. Гәзимә Ризуан ҡыҙы Хәмитованы — Дәүләкән районы «Бик-Карамалы» колхозының колхозсыһы.

286. Миннур Вәлиулла ҡыҙы Хәмитованы — Дәүләкән районы «Бик-Карамалы» колхозының колхозсыһы.

287. Марғуба Хәсән ҡыҙы Хәлиованы — Туймазы районы «Булә-тау» колхозының колхозсыһы.

288. Фәриҙә Харис ҡыҙы Харисованы — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

289. Зөбир Хәсән улы Хәсановты — Янаул районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

290. Фуат Закир улы Хафизовты—Туймазы районы «Булә-тау» колхозының председателе.

291. Ағзам Нигмәт улы Хисмәтуллинде — Баймаҡ районы «Ураҙа» колхозының председателе.

292. Ғизетдин Хисмәт улы Хисмәтовты — Әбйәлил районы «Яңы тормош» колхозының звеноводы.

293. Федора Николаевна Чекурованы — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

294. Иван Викторович Чудиновты — Базы МТС-ының шоферы.

295. Константин Александрович Чудиновты — Базы МТС-ының токаре.

296. Ямалтдин Шәймәрдән улы Шәймәрдәновты — Янаул районы «Коммуна» колхозының колхозсыһы.

297. Вәлит Шакировты — Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

298. Сәғиҙә Шамсаеваны—Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

299. Сәбиҙә Шакир ҡыҙы Шамсаеваны — Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

300. Олена Шамрай ҡыҙы Шамраеваны — Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

301. Мәшүҙә Ғилметдин ҡыҙы Шамратованы — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.

302. Хәбиб Кашап улы Шәмсуллинде — Туймазы районы Шмидт исемендәге колхоздың колхозсыһы.

303. Нигмәтйән Шәрәфетдин улы Шәрәфетдиновты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

304. Бикә Шафиковаға — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

305. Юныс Шафиковты — Дәүләкән районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

306. Изибика Ғәйнан ҡыҙы Шаһмаратованы — Баймаҡ районы «Ураҙа» колхозының колхозсыһы.

307. Владимир Гаврилович Шевчуковты — Базы МТС-ының ҡатмарлы молотилка машинисе.

308. Татьяна Андреевна Шерстобитованы — Бөрө районы Горький исемендәге колхоздың колхозсыһы.

309. Әнфиса Ивановна Шестаковаға — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.

310. Марфа Яковлевна Шишаковты — Дәүләкән районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.

311. Любовь Ивановна Шуленованы — Мишкә районы «III Интернационал» колхозының колхозсыһы.

312. Татьяна Игнатьевна Шумаковаға — Маҡар районы «Әлкә» колхозының колхозсыһы.

313. Анна Алексеевна Юлинаны — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.

314. Авдей Ефремович Юркинты — Янаул районы «Үрнәк» колхозының председателе.

315. Татьяна Федоровна Юферованы — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.

316. Сергей Герасимович Яковлевте — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.

317. Басюк Якупович Якуповты — Ҡалтасы районы Крупская исемендәге колхоздың колхозсыһы.

318. Ғәзим Хәбибрахман улы Якуповты — Маҡар районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.

319. Яхия Яҡуп улы Якуповты — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.

320. Ашытнуер Яҙгә улы Ялиловты — Ҡалтасы районы «Красный Таһып» колхозының колхозсыһы.

321. Калавтдев Ямтеевте—Янаул районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.

322. Әкрәм Яхинде — Янаул районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.

(Аҙағы киләһе номерҙә).

Киров районы партия активе йыйылышы

Ошо көндәрҙә БАССР Министрҙәр Советы залында Өфө ҡалаһы Киров районының партия активе йыйылышы булып үтте. ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Григорьев партияның өлкә, ҡала һәм район конференцияларының йомғаҡтары тураһында доклад яһаны.

Докладсы Башҡортостан партия ойошмаһы тарафынан эшләнгән гайәт ҙур эштәр, өлгәшелгән уңыштар тураһында һөйләне һәм XXI өлкә конференция тарафынан күрһәтелгән етешһеҙлектәргә туҡталды.

— ВКП(б)-ның XXI өлкә конференцияһы коммунистарҙең идея-политик кимәлдәрен күтәреү, хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште тейешле кимәленә күтәреүҙе хөндәҡ иң мөһим бурысы итеп ҡуйҙы, — тине докладсы.—Был мөһим бурысты үтәү өсөн беҙҙең район комитеты практик эшкә тотондо. ВКП(б) тарихын өйрәнеүселәргә ярҙамға 47 лекция үткәрелде, 30 консультант билдәләнде. Улар партия тарихын, Ленин һәм Сталин биографияларын өйрәнеүселәргә консультация бирәләр. Районда ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса ойошторолған түңәрәктәрҙен 17-һендә занятиелар регуляр рәүештә үткәрелә һәм уларҙа уҡыусы коммунистар занятиеға билдәләнгән тема буйынса алдан әҙерләнеп, конспект төҙөп килеләр. Был түңәрәктәр ошо бер ай эсендә ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса төҙөлгән программаны үтәсәктәр.

— Ләкин, — тине ул, — районда ойошторолған политик түңәрәктәрҙең ҡайһы берҙәре әле булһа формаль ғына йәшәй. Мәҫәлән, район Советы исполкомы партия ойошмаһы ҡаршында ике түңәрәк ойошторолған, уларҙың икеһе лә һәсап эшләй. 29 мартта түңәрәк занятиеһена... ике кеше килде, шуға күрә занятие булманы. Район Советы исполкомының етәкселәре үҙҙәре лә политик белем кимәлдәрен күтәреү эшенә әһәмиәт бирмәйҙәр. Исполком председателенең урынбаҫары иптәш Ахунов бөтөнләй уҡымай. Уның өсөн уҡыу иң ауыр эш булып иҫәпләнә. Урман хужалығы Министерствоһының, партия ойошмаһы ла (секретаре иптәш Мансуров) коммунистарҙең уҡыуҙары тураһындағы мәсьәлә менән шөғөлләнмәй.

— Бына был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү беҙҙең район коммунистаре өсөн үҙәк мәсьәләләрҙең береһе булып тора. Шуның менән бергә, район предприятиеларенә етәкселек итеүсе коммунистарҙан совет экономикаһын өйрәнеү талап ителә. Шунһыҙ предприятие эшенә дөрөҫ етәкселек итеү мөмкин түгел. 1948 йылдың I-се квартал планын район предприятиелары үтәп еткермәнеләр. Бының сәбәбе предприятие етәкселәренең эште дөрөҫ ойоштормауҙарында. Беҙҙең бурыс — Беренсе май алды социалистик ярышын киң йәйелдереп, производство планын арттырып үтәү өсөн көрәш ойоштороуҙан тора.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа сығып һөйләүселәр районда хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреш шарттарын яҡшыртыу, уларҙың эш шарттарын тейешле кимәлгә ҡуйыу буйынса район Советы исполкомының һәм райкомдың әле булһа борылыш яһамауҙарын тәнҡитләнеләр. 2

— Беҙ предприятие эшселәренең культура-тормош шарттарын яҡшыртыу мәсьәләһе менән тейешенсә шөғөлләнмәйбеҙ,—ти иптәш Хурамшин. — Мәҫәлән, тау оборудованиелары заводы партия ойошмаһы завод эшселәренең дөйөм ятаҡтарын яҡшыртыу тураһында хәстәрлек күрмәй. Унда гигиена-санитария ҡағиҙәләре еренә еткерелмәй. Шулай уҡ кирбес заводы партия ойошмаһы ла эшселәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыу мәсьәләһе менән шөғөлләнмәй.

Район Советы исполкомы председателе иптәш Капустин үҙенең сығышында хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын тикшереү эшенең торошона туҡталды.

— Жалобаларҙың һәм ғаризаларҙың күбеһе, — тине ул, —торлаҡ тураһында.

Йыйылышта ҡатнашыусылар иптәш Капустиндан был мөһим мәсьәләне хәл итеү буйынса район Советы исполкомының конкрет эше тураһында һөйләр,—тип көткәйнеләр. Ләкин иптәш Капустин, тыңлаусыларҙы ғәжәпкә ҡалдырып, — торлаҡ һорап яҙылған 200 ғаризаны... кире ҡаҡтыҡ, квартира бирмәнек. Жалобалар менән килеүселәрҙе ҡабул итеү өсөн көн һәм сәғәттәр билдәләнек,—тип әйтеү менән сикләнде.

Фекер алышыуҙарҙа шулай уҡ ВКП(б) райкомының кадрҙар буйынса секретаре Ғәрипов, Өфө связь контораһының партия ойошмаһы секретаре Кафтанов, ВЛКСМ райкомы секретаре Сибирцев, ВКП(б) ҡала комитеты секретаре Носов һәм башҡа иптәштәр сығып һөйләнеләр.

Партия активе йыйылышы партияның XXI өлкә конференцияһы ҡарарҙарын бер күңелдән хупланы һәм күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә, партия-политик һәм партия-ойоштороу эштәрен күтәреүгә юналтылған ҡарар ҡабул итте.

М. Сәғадиева.

Социалистик Хеҙмәт Геройы

Тихон Алехин

Тихон Алехин немец бандиттарҙең тәүге ярһыулы атакаларын кире ҡағыу өсөн ҙур, батырлыҡтар күрһәтеп һуғышһа ла, һалдат шурпаһын оҙаҡ татырға тура килмәне уға — ауыр яраланып, 1943 йылдың көҙөндә уҡ «Новая жизнь» колхозына, бында йәшәүсе семьяһы эргәһенә әйләнеп ҡайтты. Уны завхоз да, баҡсасы ла итмәксе булдылар, уның кесәнән килерҙәй бөтә эштәрҙе лә тәҡдим итеп ҡаранылар.

Тихон Егорович Алехин инвалидлек книгаһын тотоп баҡса ҡулағаһында ятырлыҡ түҙемлек тапмаңы үҙендә. Көндәрҙең береңдә, йөрәк һағышын баҫыр өсөн, тип, тотто ла алыҫ баҫыуҙа ҡуна ятып эшләүсе трактор бригадаһына китте. Механизаторлыҡ эшенә яраҡһыҙ булып ҡайтыуынан асынып, әлегә тиклем трактористар менән танышырға, һөйләшергә лә уңайһыҙланып йөрөй ине ул. Күсмә вагончик эргәһендә Тихон Егоровичте алтмыш йәштәр самаһындағы ҡарт — Игнат бабай Зубарев ҡаршыланы.

— Ҡараууылға ҡуйҙылармы, бабай,—тине Алехин, үҙенә аҙ таныш булған ҡартҡа һалдаттарса ябайлыҡ менән папирос тәҡдим итте. Ләкин ҡарт, папирос тартмаһына күҙен дә һалманы, иҫәнлек-һаулыҡ та һорашып тормайынса, ҡыҙҙы ла китте:

— Нисек инде ул — ҡараууылға? Һеҙ фронтҡа китһәс тә, тракторҙарҙы һарайға бикләп ҡуйырҙар, тип уйлағайнығыҙмы? Булмай торһон! Трактор йөрөтөүҙә Игнат бабай менән ярышып ҡара әле тәүҙә...

Алехин һаҡалына сал ингән был ҡартты, үҙ атайы кеүек итеп ҡосаҡлап алды, тулҡынланыуҙан әйтер һүҙҙәрен әйтә алмайынса, уның ҡулдарын ҡат-ҡат ҡыҫты.

Тихон Егорович шул килеүенән йәшелсә баҡсаһына әйләнеп ҡайтманы: төнгө сменаван һуң ауырып киткән тракторсыҡа урынына эшкә ҡалды.

Тихон Егорович һуғышҡа тиклем тракторист булып эшләгәйне, ләкин ул эш минуттарының ҡәҙерен белергә, тәүәккәллекка һәм талапсанлыҡҡа фронтта өйрәнеп ҡайтты. Көндәлек нормаларҙы үтәүҙе лә үҙҙәренең ҙур уңыштары итеп иҫәпләргә, әйләп ҡына эшләргә күнеккән трактористарға иң тәүҙә яңы бригадирҙең бына ошо талапсанлығына күнегергә тура килде. Пар күтәртеү, түңгә һөрөү осоронда, көндәр ҡыҫҡара башлаған был ваҡытта, яландарҙа кистәрен дә өҙлөкһөҙ хәрәкәт итеүсе уттар күренә башланы. Бригадир Алехин тракторҙар өсөн үҙ ҡулдары менән ябай фонарҙар яһап алғайны. Ошо уттар яҡтыһында төнгө сменаларҙа эшләү ер туңғанға тиклем туҡталманы. Машиналарға техник тәрбиә яҡшыртылмаһа, Тихон Алехин запас частарҙы табыу сараларын күрмәһә, ул сезонда бригада үҙ заданиеһен үтәй ҙә алмаған булыр ине, бәлки. Ләкин Тихон Егорович тәүге аҙымдарҙан уҡ етәкселек эшендә эҙмә-эҙлеклә ынтылды, бер ваҡытта ла алдына ҡуйған маҡсатына ирешмәй туҡталманы. Сезон заданиеһе арттырылып үтәлде һәм бригада МТС-та алдынғылар рәтенә сыҡты.

1946 йылда бригадалағы һәр бер шартлы тракторға 818 гектар ер һөрөлдө.

Тағы ла юғарыраҡ уңыштарға ирешеү өсөн көрәшергә, МТС-та ғына түгел, бөтә республикала данын шаулаған тракторист Желобецкий менән тиңләшергә, хатта уны уҙып китергә кәрәк ине.

Үҙған йылдың яҙында ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙарын өйрәнгәндә Тихон Егорович үҙ бригадаһының тракторисҭәре менән бына шул турала һөйләште. Улар шартлы һәр бер тракторға 1.000-әр гектар ер эшкәртергә һәм үҙҙәре эшкәрткән участкала урожайлылыҡты элекке йылдарға сағыштырғанда бер ярым тапҡырға арттырыуҙы тәьмин итергә һүҙ бирҙеләр.

Алехин бригадаһының йөкләмәһе бөтә МТС коллективе алдында иғлан ителде.

Әйткән һүҙҙәрендә торорлоҡ, эште башҡарып сығырлыҡ тәжрибә туплағандар ине инде был бригадаһың егеттәре. Шуға ҡарамаҫтан, алдынғыларҙың эш методтарын өйрәнеүҙән, ижади эҙләнеүҙән туҡталманылар. Яҙғы ямғырҙар башланғас, эште аҡрынайтмаҫ өсөн, трактор тәгәрмәстәренә 18—19 сантиметр киңлектәге ушкирителдәр ҡуйыу тәҡдимен йәш тракторист Тимофей Стручков индерҙе. Тракторҙарға бураҙнала заправка яһау, һыуҙы ер баштарында бер нисә минуткала тотоу көндәлек ғәҙәткә инеп китте. Бригадала запас частәр етерлек тиклем булдырылғайны: ваҡ-төйәк ремонт яһатыу өсөн бер ваҡытта ла МТС-ҡа барып йөрөргә тура килмәне. Тихон Алехин тарафынан закон итеп ҡуйылған тағы бер ҡағиҙә бөтә сезон буйына боҙолманы: ерҙең һәр метры сифатлы итеп эшкәртелергә тейеш ине. Был — һәр кем өсөн изге ҡағиҙә булды.

Тихон Алехин һәм уның егеттәре үҙ һүҙҙәрендә торҙолар. Трактор эштәре планы 168 процентҡа үтәлде. Колхозда ашлыҡ һуғыу тамамланғас, еңеүселәр үҙҙәренең эш һөҙөмтәләре тураһында рапорт бирҙеләр: трактор бригадаһы тарафынан эшкәртелгән ерҙән арыштың һәр гектарынан 16,7 центнер, бойҙайҙың һәр гектарынан 11,7 центнер, ә 150 гектар арыштың һәр гектарынан уртаса 21,4-әр центнер урожай йыйып алынғайны.

Дәүләкән МТС-ының алдынғы трактор бригадаһы бригадиры Тихон Егорович Алехинға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бына ошо хеҙмәттәре өсөн бирелде.

Юғары награда менән ҡотлап, алдағы яҙҙағы эштәрендә ҙур уңыштар теләйбеҙ Һеҙгә, Тихон Егорович!

Ғ. Әхмәтшин.
Ғ. Идрисов.

Ужым сәсеүлектәренә—хәстәрле тәрбиә

1.200 гектар ужым аҙыҡландырыласаҡ

ҮРГЕ-ҠЫИҒЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Колхоздарҙа ойошторолған комсомолец-йәштәр звенолары ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуға ныҡлы әҙерлек алып баралар.

«Һабансы» һәм Тимирязев исемендәге колхоздарҙа Гилманова һәм Баһауликова иптәштәр етәкселек иткән звенолар быйыл үҙҙәренә беркетелгән участкала һәр бер гектарҙан 25—30-ар центнер урожай алыу бурысын ҡуйҙылар. Улар быйыл ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң ҡулланасаҡтар.

Тимирязев исемендәге колхоздың звеноводы иптәш Баһаулинова республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы СССР Верховный Советы Президиумының Указын ишеткәс менән үк звено члендарын быйылғы һәм улар менән тағы ла киңәк итеп юғары урожай алыу өсөн көрәш ойоштороу тураһында кәңәште. Ошо йыйылышта звено члендәре баҫыу эштәре башланғанға тиклем тағы ла күберәк ашламалар әҙерләргә ҡарар итеп, еңһыҙ һыҙғанып эшкә башланылар. Колхоз правлениеһе звеноға 8 эш аты һәм өҫтәмә рәүештә кешеләр беркетте. Звено члендәре үҙ участкаларына 1.800 йөк тиреҫ сығарҙылар, 107 центнер көл йыйнанылар. Ужымдарҙы аҙыҡландырыу өсөн өс мискә һәм башҡа инвентарҙар әҙерләнде.

Райондың колхоздары яҙ 1.200 гектар ужым сәсеүлеген аҙыҡландырасаҡтар, 5.500 гектар майҙанда тырматыу үткәрәсәктәр. Бөтә колхоз, бригада һәм звеноларға ла был эш буйынса конкрет задание бирелде. Етерлек ашлама әҙерләнде. Бары тик комсомолец-йәштәр звенолары кәсә менән генә 1.500 центнер көл һәм 105 центнер ҡош тиҙәге йыйнанды.

Н. Ғәлимов.

Эш башланды

АСҠАР, (Телефон аша). Баҫыуҙар тиҙлек менән ҡарҙан әрселәләр. Әбйәлил районында беренсе булып «Алға» колхозы баҫыу эштәрен башлап ебәрҙе. Ҡултавдан бирле ҡуҙатеү эштәре алып барған Ғәлиуллина, Хәсбөйәрова иптәштәрҙең звенолары беренсе мөмкинлек тыуыу менән үҙҙәренең ужым участкаларына килделәр.

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу киң рәүештә алып барыла. Ашламаларҙан көл, тиреҫ шыйыҡсаһы ҡулланыла.

«Серп» колхозында ла ужымдарҙы аҙыҡландырыу эше ҡыҙыу бара. Арыштың һәр гектарынан 150-шәр бот урожай алырға һүҙ бирген иптәш Ликунова звеноһы үҙ участкаһын аҙыҡландырыуҙы колхозда беренсе булып тамамланы.

Баҫыу эштәренә райондың башҡа колхоздары ла ҡушылалар. Район буйынса 400 гектарҙан артыҡ ужым сәсеүлеге өҫтәмә аҙыҡландырылды ла инде.

Х. Баимов.

КАБАРДА КОЛХОЗДАРЫ ИГЕН ҺУҒАРЫУ АРЫҠТАРЫ ТӨҘӨЙҘӘ

НАЛЬЧИК. (ТАСС). Терек районы Кабарданың ҡоролоҡ зонаһында урынлашҡан. Дымлыҡ етешмәү арҡаһында бында урожай түбән була. Хәҙерге ваҡытта элекке гидросооружениеларҙы төҙәтеү һәм ядыпап-төҙәү эштәре башланды. «Доя» ауыл хужалығы артеленең баҫыуҙарында, 11 километр оҙонлоҡтағы иген һуғарыу арыҡтарын үткәреү эше тамамланды. Колхоҙға был бер нисә йөҙ гектар майҙанды һуғарыуға мөмкинлек бирасаҡ. Красная Армия исемендәге колхозда ла арыҡ үткәреү эше тамамланды. Бында ашлыҡтары йыл да дөгө беренсе тапҡыр һуғарылған ерҙә сәселәсәк.

Май, Урожай, Чегем райондарында бөтә халыҡ ҡатнашлығында яңы арыҡтар төҙөлә һәм элеккеләренә ремонттар үҙғарыла.

Ағымдағы йылда Кабардала бөтәһе 20 мең гектар ер һуғарыласаҡ.

Колумбиялағы ваҡиғалар

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель. (ТАСС). Колумбияның башҡалаһы Боготала баш күтәреү тураһында буталасыҡ хәбәрҙәр алына. Баш күтәреүселәр ҙә, шулай уҡ хөкүмәт лидерҙары ла үҙҙәренең уңышҡа өлгәшеүҙәре тураһында хәбәр итәләр. Тынысһыҙланыуҙарҙың ниндәйҙер билдәһеҙ бер кешенең либераль партия лидеры Гайтанды үлтергәндән һуң һәм үтеп барыусы бер кеше Гайтанды үлтергән кешене үлтереп, уның мәйетен президент дворецы ишеге алдына ҡуйғандан һуң башланғанлығы тураһында ике яҡтан да алынған мәғлүмәттәр бер төрлө. Бынан һуң Богота радиоһы, «либераль партияның революцион комитеты» Колумбияла власте үҙ ҡулына алды, тип хәбәр итә.

Боготаның үҙәк районында бик күп биналар яндырылған һәм трамвайҙар, автомобилдәр ватылған. Америка хәбәрселәре ошо тынысһыҙланыуҙарҙың шаһиттәре булғандар һәм бер нисә мәйетте күргәндәр. Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Боготанан ебәргән һуңғы хәбәрендә, Америка посольствоһы районында мылтыҡтан атышыу дауам итә, тип әйтелә. Күп кенә пожарҙар әлегә тиклем һүндерелмәгән. Дворецте һаҡлаусы кешеләр, Оспина Перес һәм либераль партия лидерҙары һаман да әле президент дворецында кәңәшмә үткәреүҙәрен дауам итерәләр, тип белдерәләр.

НЬЮ-ЙОРК, 9 апрель. (ТАСС). Колумбиянан алынған бөтә хәбәрҙәр ҙә, бындағы тынысһыҙланыуҙарҙың либераль партия лидеры Гайтан үлтерелгәндән һуң уҡ башланғанлығын күрһәтәләр, бында тынысһыҙлыҡтар өсөн булған бөтә яуаплылыҡты коммунистар партияһына йөкмәтеү маҡсатында кампания башланды ла инде.

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель. (ТАСС). «Нью-Йорк геральд трибюн» газетаһының Боготалағы хәбәрсеһе Джонсон, АҠШ-тың Америка-ара конференциялағы делегаттары Америка-ара конференцияны дауам итерер өсөн бер ниндәй ҙә мөмкинлек юҡ тигән фекергә килделәр, тип хәбәр итә. Урам һуғыштары дауам итә. Ҡорбан булыусылар һаны билдәле түгел, ләкин һәм тигәндә 20 кеше үлтерелгән, тип уйлайҙар. Баш күтәреүселәр радиоһы Колумбияның сит ил эштәре министры Гомес, консерватив сенатор Леон Валенсиа һәм юстиция министры Антонио Монтальво үлтерелделәр, тип таратты, ләкин Джонсон был хәбәрҙәрҙе тикшерә алмай. Боливер майҙанында Капитолия бинаһы алдында Валенсия аҫылды, тип хәбәр ителә. Был бинала Америка-ара конференция алып барылды. Америка-ара конференциялағы сит ил делегацияларының ҡайһыһы да булһа үлтерелеүе йәки яраланыуы тураһында бер ниндәй ҙә хәбәрҙәр юҡ. Мексика делегацияһы Мексика флагын күтәреп Капитолия бинаһынан сыҡты, ләкин Капитолиянан алыҫ булмаған отелдәлә торыусы Америка делегаттары урамға сыҡмайҙар, сөнки уларға Ҡушма Штаттар Флагының «ярҙам итеүе йәки ҡомасаулауы» тураһында ышанмайҙар.

Демонстранттар трамвайҙарҙы әүҙәрҙеләр һәм автомобилдәрҙе ваттылар, шулай уҡ хөкүмәттең бер нисә бинаһын һәм консерватив газета «Эль Сигло» редакцияһының бинаһын яндырҙылар, тип хәбәр ителә. Был газета сит ил эштәре министры Гоместеке ине. Джонсон, «ғәскәрҙәрҙең гражданский кешеләрҙе үлтереүен һәм талаусыларҙың граждандар халҡын иҙгәнлеген» күҙәтеп торған.

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель. (ТАСС). Ассошиэйтед Пресс агентствоһының хәбәрсеһе Боготанан, 9 апрелдә билдәһеҙ бер кеше Колумбия либераль партияһы етәксеһе Гайтанға атҡандан һуң (ул 1946 йылда президент посына кандидат итеп күрһәтелгәйне) 1 меңдән артыҡ демонстрант Америка-ара конференция ултырыштары бара торған милли дворецты ваҡытлыса үҙ ҡулына алды һәм хөкүмәт властен ваҡытлыса үҙ ҡулына алды, тип хәбәр итә. Гайтан серьез яраланған, тип хәбәр итәләр. Ассошиэйтед Пресс хәбәрсеһе, күптән түгел Колумбияның либераль партияһы Гайтанды 1950 йылда буласаҡ президентҡа һайлауҙарҙа кандидат итеп күрһәтеүҙе хуплағайны, тип күрһәтә. (Һуңғы ваҡытта Гайтан һәм либераль партияның башҡа лидерҙары консерватив партияның реакцион лидеры Лауреано Гоместе сит ил эштәре министры итеп билдәләүгә ҡаршы килделәр. Гомес Америка-ара конференцияның председателе булып тора. Бынан бер нисә көн элек либераль партия күп кенә йыйылыштар үткәрҙе. Был йыйылыштарҙа, Гомес элек ось державалары вәкилдәре менән элемтәлә булғанлыҡтан һәм хәҙер ҙә билдәле Франко яҡлы кеше булғанлыҡтан Гоместе сит ил эштәре министры итеп билдәләүгә ҡаршы протест белдерҙеләр).

Ассошиэйтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһе, яраланған Гайтанға госпиталдә операция яһаған ваҡытта демонстранттар йыйылды, тип хәбәр итә. «Лауреано бөтһөн» тигән тауыштар менән — бында консерватив партия лидеры Гомес күҙҙә тотола — демонстранттар милли конгресс бинаһын алдылар, ундағы мебелдәрҙе ваттылар, тәҙрәләрҙе емерҙеләр һәм бер нисә бүлмәне яндырҙылар, тип хәбәр итәләр. Күп тә үтмәй, Колумбияның ғәскәрҙәре килеп етте, ләкин улар бер ниндәй ҙә саралар күрмәнеләр, тип әйтелә. Бер үк ваҡытта Боливар майҙанында меңәрләгән кеше йыйналып, Колумбия хөкүмәтен ҡолатыуҙы талап иткәндәр, һәм «Йәшәһен Колумбия армияһы, йәшәһен халыҡ» тип ҡысҡырғандар, һәм либераль партияны ҡотлағандар. Хәбәрсенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, Богота менән Нью-Йорк араһындағы бәйләнеш гринвич ваҡыты буйынса 21 сәғәттәр самаһында өҙөлгән. Бының сәбәбе билдәле түгел, ләкин, бәйләнеш цензураның фекерҙәре буйынса өҙөлгән булыуы ихтимал.

Юнайтед Пресс агентствоһы, Боготанан 10 хәбәрсе тарафынан ебәрелгән ашығыс телеграммала, хәбәр итеүҙәргә ҡарағанда Колумбияның сит ил эштәре министры һәм Колумбияның Америка-ара конференциялағы делегацияһы етәксеһе Лауреано Гомес үлтерелгән һәм Америка-ара конференция үҙенең эшен туҡтатырға мәжбүр булды, тип әйтелгәнлеге тураһында ла хәбәр итә.

Ассошиэйтед Пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Американың Боготалағы посольствоһы бинаһы алдында ҙур булмаған бер бомба шартлаған. Бының һөҙөмтәһендә тәҙрә быялалары ватылған, посольствоның мөлкәтенә башҡаса зыян һалмаған.

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель (ТАСС). Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Боготанан хәбәр итеүенә ҡарағанда, авторитетлы ҡругтар, Аргентина Боготалағы конференциянан үҙенең делегацияһын саҡыртып алды, тип белдерәләр. Делегацияны Аргентинаға алып ҡайтыу өсөн Боготаға ес самолет ебәрелгән.

Лоҡман Хәким

Һауны, яҙ

Ер өҫтөнә ҡыйыҡтарҙан төшеп,
Тамсылаша тәүге тамсылар.
Иркен аҙлап бара һәр бер кеше
Һәм йылмая яҙғы ҡаршылап.
Ҡайын суктарында бөрө тула,
Бөрөләрҙән аңҡый бал еҫе.
Бындай саҡта гүйә шиғыр тыуа,
Һәр йөрәктең килә йырлағы.
Был тойғоно шулай кемдәр генә
Кисермәгән яҙғы иртәлә...
Һәм кешеләр уны ябай ғына
Яҙғы тойғо тип йөрөтәләр.
Үҙ ташҡынын көткән йылға
кеүек,
Йөрәк ярһый, йөрәк елкенә.
Ашҡына ул яҡты нурҙар һибеп
Һайран ятҡан ҡырҙар иркенә.
Шаулап боҙҙар китер, бына бер
көн,
Ашыларҙар тубә баштары,
Сәскәләрҙән тәүге алтын бөр-
тәк
Ер ҡуйнына һибеп ташланыр,
Тимер кеүек ҡаты уҫҡа ҡыҫып,

Руле һәм һабан һаптарын,
Йондоҙолар бураҙнаға баҫып,
Яңы ынан кәсен аҡтарыр,
Тирбәләрҙә һандуғастар йыры,
Нурланырын бөтә яҡтарым,
Уй бер ҡояш булып яңы торор
Хеҙмәт даны уй бер батырлыҡ.
Ҡырҙан төслә ғамғая һәр тамсы-
ла
Баҫыуҙағы йәйгер ялҡыны,
Ошо тамсыларҙан гүйә сағыла
Бин мәйешле йондоҙ алтыны.
Ем-ем килеп шаулар гөрөлдәләр
Арба тағарысы эҙенән,
Һәр моҡабат ниндәйҙер сер эҙ-
ләр
Сирендәрҙә зәңгәр күҙенән.
Мин тауҙарға менеп — яҡты
ерға,
Гүмерен кеүек яҙы ҡаршылап,
Һауны, ҡояш,
Һауны, яҙғы елдәр,
Һауныығыҙ, тәүге тамсылар!

Балаларҙы музыкаға өйрәтеү мәктәбендә

Һүрәттә: Фортепиано класы уҡытыусыһы З. М. Челнокова һәм уҡыусы Альфред Курмаев музыка дәресе ваҡытында.

В. Жданов фотоһы.

Яңы коллектив договор актив рәүештә тикшерелде

Март айында паровоздар ремонтлау заводының цехтарында, сменаларында, бригадаларында үткән йыйыш завод администрацияһы һәм профсоюз комитеты араһында төҙөлгән коллектив договорҙың үтәлешен һәм 1948 йылға төҙөләсәк яңы коллектив договорҙы тикшереүгә арналған йыйылыштар булып үтте. Эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр договорҙы тикшереүҙә актив ҡатнаштылар. Улар бигерәк тә айырым эшселәр тарафынан государство һәм хеҙмәт дисциплинаһының боҙолоуын, хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуын, заданиеларҙың үтәлеп еткерелмәүен, брактың күп урын алып килеүен, ярыш договорҙарының систематик тикшерелә барылмауын, шулай уҡ администрация тарафынан договорға алынған ҡайһы бер йөкләмәләрҙең үтәлмәүен ҡаты тәнҡит аҫтына алдылар. Бигерәк тә заводта эшселәрҙе махсус кейемдәр менән тәьмин итеү, дәйем торлаҡтарҙы йыһазландырыу һәм ремонтлау, эшселәр тәьминатын яҡшыртыу өлкәһендә завод администрацияһы тарафынан ныҡлы саралар күрелмәгәнлеге күрһәтелде. Производствола йәшәп килгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү юлында эшселәр күп кенә яңы тәҡдимдәр индерҙеләр.

Күптән түгел завод күләмендә ошо мәсьәләгә ҡарата саҡырылған завод профсоюз конференцияһы завком председателе иптәш Шевелёвтың докладын тыңланы. Конференцияла ҡатнашыусылар етешһеҙлектәрҙе әйтеп үтеү менән бер рәттән, 1948 йыл өсөн төҙөләсәк коллектив договорға хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, эшселәрҙең эш һәм тормош шарттарын яҡшыртыуға йүнәлтелгән тәҡдимдәр индерҙеләр. Шулай уҡ улар араһында социалистик ярыш договорҙарының үтәлешен артабан даими тикшереп барыу, станоктар ремонтлау һәм кузнечный цехтарында ҡыҙыл мөйөштәр төҙөү, торлаҡ төҙөлөшө планын арттырыу, индивидуаль йорттарҙы ремонтлау һәм башҡа тәҡдимдәр бар. Конференция яңы коллектив договор менән күҙҙә тотолған пункттарҙы һәм индерелгән тәҡдимдәрҙе раҫлап, уны рәсмиләштереү мәсьәләһен профсоюз ойошмаһына йөкмәтте. Һәм алда торған Беренсе Май байрамын лайыҡлы рәүештә ҡаршылау өсөн заводтың бөтә эшселәрен, инженер техник работниктарын һәм хеҙмәткәрҙәрен социалистик ярышты киң ҡолачта йәйелдереүгә саҡырҙы.

Гәрәй Әмир.

Уҡытыусылар кәңәше

Күптән түгел Маҡар районы үҙәгендә уҡытыусылар кәңәше үткәрелде. Район уҡытыусылары «Халыҡ ара хәл», «Марксистик диалектика методтары» тигән һәм башҡа темаларға лекциялар тыңланылар. Лекцияларҙы ВКП(б)-ның район комитеты секретары Савин, пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире Заһидуллин иптәштәр уҡынылар.

«Районда халыҡ мәғарифе эшенең торошо» тигән темаға арналған доклад буйынса күп кенә уҡытыусылар сығыш яһанылар һәм үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Уҡытыусылар кәңәше Маҡар районында беренсе тапҡыр үткәрелде. Киләсәктә уны систематик рәүештә үткәрергә тейешлеген һәм уҡытыу эшенә ярҙам итәсәген уҡытыусылар билдәләп үттеләр.

Төҙөлөш материалдары

Башҡортостан коммуналь хужалыҡ Министерствоһының «Башкомснаб» конторыһы беренсе кварталда республика ҡалаларының коммуналь хужалыҡ һәм торлаҡ бүлектәренә 1 миллион 104 мең һумлыҡ төҙөлөш материалдары ебәрҙе. Ул төҙөлөш материалдары торлаҡ йорттарына ремонт үткәреү өсөн файҙаланылырға тейеш.

Ебәрелгән төҙөлөш материалдарынан Өфө ҡалаһына 140 мең данә кирбес, 130 тонна алебастр, 90 тонна аҡбур, 2155 квадрат метр тәҙрә быялаһы, 20 тонна лак-буяу, 35 тонна ҡаҙаҡ, 18 тонна төрлө тимер, шулай уҡ электр оборудованиелары, инструменттар, тәҙрә һәм ишек таҡталары бүленде.

А. Исламов.

Тырыш хеҙмәт өсөн

ВЛКСМ-дың Башҡортостан өлкә Комитеты 1947 йылда республика ҡала малдарҙы үрсетеүҙә һәм уларҙың продуктивлеген күтәреүҙә гүзәл хеҙмәт өлгөләре күрһәткән өсөн бер төркөм комсомолецтарҙы һәм йәштәрҙе грамота менән наградлау тураһында ҡарар ҡабул итте.

Наградланыусылар араһында Ҡыйғы районы Киров исемендәге колхоздың һарыҡ ҡараусыһы Тәнзилә Динисламова бар. Ул 38 баш һарыҡтан 82 бәрәс алып, бөтәһен дә тәрбиәләп үҫтерҙе. Архангель районы «Память Чапаева» ауыл хужалығы артеленең һыйыр һауыусыһы комсомолка Антонина Зуеваға үҙған йыл бер һауын һыйырҙан 8 мең 225 литр һөт алған өсөн Почет Грамотаһы бирелде.

Малсылыҡты үҫтереү алдынғыларынан бөтәһе 43 кеше ВЛКСМ Өлкә Комитетының Почет Грамотаһы менән наградланды.

ЛЕНД-ЛИЗ БУЙЫНСА АЛЫНҒАН 8 САУҘА СУДНОҺЫ ҠУШМА ШТАТТАРҒА КИРЕ ҠАЙТАРЫЛДЫ

Совет матбуғатында әлегә тиклем хәбәр ителгәненсә, ленд-лиз буйынса пароходтар ҡайтарыуға ҡарата ошо йылдың ғинуар айында Советтар Союзы менән Америка хөкүмәттәре араһында алып барылған һөйләшеүҙәр айҡанында ленд-лиз буйынса һуғыш ваҡытында Советтар Союзына бирелгән 7 танкерҙы һәм ҡоро йөк ташыусы бер судноны февраль айы эсендә Ҡушма Штаттарға кире ҡайтарыу тураһында килешеүгә өлгәшелгәйне.

ТАСС тарафынан авторитетлы сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Триест, Гонконг һәм Йокогама порттарында 20 февралдән алып 27 мартҡа тиклем булған осорҙа ошо күрһәтелгән 8 судно Ҡушма Штаттар хөкүмәте вәкилдәренә тапшырылған. (ТАСС).

Висконсин штатындағы тәүге һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре

НЬЮ-ЙОРК, 11 апрель. (ТАСС). Америка матбуғаты Висконсин штатындағы һайлауҙарҙың иң һуңғы тип әйтерлек һөҙөмтәләре тураһында хәбәр итә. Тауыш биреү һөҙөмтәһендә Стассен республикан партияның буласаҡ милли съезындағы 19 делегаттың тауышын, Макартур — 8 тауышын, ә Нью-Йорк штаты губернаторы Дьюи бер тауыш та алмаған.

Сауҙа ойошмаларында большевистик тәртип урынлаштырырға

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ план азыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарын йән башына ҡулланыуҙы байтаҡ арттырыуҙы күҙҙә тота. Аҡса реформаһын үҙгәртеү һәм карточка системаһын бөтөрөү сталинсе планда күрелгән сараларҙың реаль тормошҡа ашыуын асыҡ күрһәтте.

СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1947 йыл 14 декабрь ҡарарынан һуң республика сауҙа ойошмалары байтаҡ ҡына уңыштарға өлгәштеләр. Был ваҡыт эсендә Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында 129 яңы магазин асылды. Тауар әйләнеше, карточка системаһы бөтөрөлгәнгә тиклемге осорға ҡарағанда, бик күп артты. Магазин работниктары совет потребителен культуралы хеҙмәтләндерә башланылар.

Ләкин сауҙа ойошмаларының эшендә уңыштарға ҡарағанда етешһеҙлектәр күберәк. Күп урындарҙа магазиндар ҡалаларҙың үҙәк урамдарына тупланған. Мәҫәлән, Өфөлә магазиндар Карл Маркс, Ленин, Сталин исемендәге урамдарға урынлаштырылған. Ә шул ваҡытта Чернышевский, Фрунзе, Туҡай исемендәге урамдарҙа магазиндар бөтөнләй юҡ. Октябрь Революцияһы исемендәге заводта ни бары ике генә ларек эшләй. Магазиндарҙың бер урынға ғына тупланыуы ҙур нәүбәттәр тыуҙырыуға төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Черниковск, Бөрө, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ ҡалаларында ла шундай уҡ хәл.

Республикабыҙҙа сауҙа селтәренең торошо совет потребителенең көндән-көн үҫә барған талабын ҡәнәғәтләндермәй. Күп урындарҙа магазиндар культуралы сауҙа итеүгә яйлаштырылмаған. Белорет ҡалаһында магазиндар ремонтланмай, ябылмай, прилавкалар йыһазландырылмаған. 29, 30, 31 һәм 32-се номерлы магазиндарҙа санитария ҡағиҙәләре һаҡланмай. Бөрө ҡалаһында 3-сө, 4-се һәм 9-сы номерлы магазиндарҙа ҡараһаң, тауар ҡуйыр өсөн киштәләр, йәшниктәр, прилавкалар юҡ. Икмәк һәм башҡа азыҡ-түлек тауарҙары иҙәндә йыйылмай һаҡлана, Октябрьск, Дәүләкән, Бәләбәй ҡалаларындағы магазиндарҙың эше тураһында ла шуны әйтергә мөмкин.

Магазиндарҙың техник йыһазландырылыуы ҡәнәғәтләнерлек түгел. Тик Өфө ҡалаһының 1-се торгындағы магазиндарҙа 17 үлсәү, 16 комплект гер, 12 насос, икмәк бысаҡтары, ваҡыҡ тетеүсетар, һоҫҡолар, ваҡыҡ һөбөргестәр һәм счеттар, май баҡтары, буранкалар, кружкалар, метрҙар һәм башҡалар етешмәй.

Һатыла торған тауарҙарҙың берҙәй прейскурант хаҡтарын индереү һәм уларҙы дөрөҫ ҡулланыу партия һәм хөкүмәт ҡарарын үтәүҙә иң мөһим сараларҙың береһе булып тора. Ләкин республика сауҙа ойошмалары был талапты үтәмәйҙәр, ә киреһенсә, боҙоп киләләр. Мәҫәлән, Өфөлә 1-се торгтың 27-се магазинында, Стәрлетамаҡ фабрикаһында эшләнгән 238 һум торған полубатинкалар модельный туфлиҙар хаҡы менән 367 һумға, ир балалар өсөн 65 һум 50 тинлек батинкалар 105 һумға һатылған. Мехтан тегелгән 522 һумлыҡ жакеттар 810 һумға баһаланған. 2-се торгтың 1-се номерлы магазинында 569 һумлыҡ ҡатын-ҡыҙҙар костюмдары 676 һумға һатылған. Шулай итеп, Өфөнөң сауҙа ойошмалары тик ғинуар айында ғына хеҙмәтсәндәрҙән 61 мең 900 һум аҡса артыҡ алғандар.

Бөтә был фактылар тураһында БАССР сауҙа Министерствоһына үҙ ваҡытында хәбәр ителде. Ләкин Министерство был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса сара күрмәне һәм РСФСР сауҙа министры иптәш Макаровтың прейскурант хаҡтарын тикшереүҙе үҙгәртеү тураһындағы күрһәтмәһен үтәмәне. Шуның өсөн дә тауарҙарҙың берҙәй прейскурант хаҡтарын боҙоу фактылары һаман да йәшәп килә. Октябрьскиҙа (торг директоры иптәш Донец) 1-се номерлы магазинда (директоры Галиевтары) 110 һум 50 тин торған ирҙәр полубатинкалары 140 һумға, 8 һумлыҡ еҫле һабын 9 һумға һатылған. Был магазин работниктары бер ай ваҡыт эсендә потребителдәрҙе 5 мең 581 һумға алдағандар.

Өфө икенсе торгының 8-се номерлы магазинында (директоры Николаев) ҡалушка алыусыларҙан 6 һум, ирҙәр пальтоһы алыусыларҙан 236 һум артыҡ алғандар.

БАССР сауҙа министерствоһы һәм уның урындағы ойошмалары етәкселәренең магазиндарҙың эше менән аҙ ҡыҙыҡһыныуҙары һәм улар тарафынан контролдең булмауы һөҙөмтәһендә сауҙа аппаратына оялаған ҡайһы берәүҙәр совет сауҙаһы принциптарын тупаҫ боҙалар. Ишембай ҡалаһының 1-се номерлы магазин директоры Барышева күп ваҡыттар буйына, үҙенең шәхси тауарҙарын магазинда спекулятив хаҡҡа һатып килгән.

Өфөнөң 1-се торгында халыҡтан әйберҙәр һатып алыу магазиненең мөдире Щербаков һәм скупщик Бикнуров хеҙмәтсәндәрҙе систематик рәүештә алдап килгәндәр. Улар хеҙмәтсәндәрҙән һатып алынған әйберҙәргә 8 процент, яңы тауарҙарға 10 процент торг файҙаһына скидка яһау урынына, 40, 60 процент скидка яһағандар. Гражданка Нурисламова «лодочка» фасонындағы туфлиҙар өсөн, 171 һум 10 тин биреү урынына, 90 һум ғына биргәндәр. Шулай итеп, Щербаков менән Бикнуров ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә хеҙмәтсәндәргә тейеш булған 52 мең 180 һум аҡсаны үҙләштергәндәр.

Ошо уҡ торгтың 20-се номерлы магазинында һатыусы Жаркова һәм Копейска потребителдәргә тауарҙы тейешле ауырлығында үлсәп бирмәй килгәндәр. Улар һәр бер 3 килограмм пакетка 320 грамм он һатып еткермәгәндәр. Беренсе номерлы киоскала һатыусы Тляпин потребителдәргә һәр бер үлсәүҙә 25 грамм балыҡ биреп еткермәгән.

Черниковск ҡалаһының 5-се номерлы магазинында һатыусы Душенкина 3,5 килограмм шәкәр, 17 килограмм һабын һәм 3 килограмм канфет үҙләштергән. 9-сы номерлы магазиндың һатыусыһы Сафина 3,3 килограмм аҡ икмәк һәм 6,6 килограмм онды үҙе өсөн йәшереп ҡалдырған. Магазинда шырпы юҡ, ә шул ваҡытта 500 ҡап шырпы прилавка аҫтында йәшерелгән. 24-се магазиндың мөдире Кошкина, потребителдәрҙе алдап, 29 килограмм он һәм 5,8 килограмм балыҡ үҙләштергән. Машиналар төҙөү заводы эшселәр тәьминате бүлегенең 4-се номерлы магазинында (мөдире Гиндуллин) һатыусы Попанарчук һәр бер ике килограмм икмәк үлсәгәндә потребителдәргә 16 граммдан алып, 10 граммға тиклем икмәк биреп еткермәгән. Хеҙмәтсәндәрҙе алдау фактылары Ағиҙел йылға пароходствоһы, 8-се март исемендәге тегеү фабрикаһы эшселәр тәьминате бүлектәре магазиндарында ла бар.

СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарары асыҡ культуралы совет сауҙаһын көндән-көн киңәйтеүҙе күҙҙә тота. Ләкин партия һәм хөкүмәттең был ҡарары күп урындарҙа үтәлмәй. Өфөлә тәүлегенә 130 тонна икмәк бешерелә. Бының ни бары 50 тоннаһы ғына асыҡ сауҙа селтәренә бирелә. Ҡалған икмәкте төрлө ведомстволарҙың ОРС-тары алалар һәм икмәкте үҙ предприятиеларының территорияһында һаталар. Өфө паровоз ремонтлау заводы магазиндарынан икмәк алып булмай. Сөнки икмәк өсөн аҡсаны завод территорияһында урынлаштырылған кассаға түләргә кәрәк. Был факт асыҡ совет сауҙаһын айырым кешеләр тарафынан ябыҡ сауҙа системаһына әйләндереүҙәре тураһында һөйләй.

Потребителдәргә тауар ебәреү нормалары үтәлмәй. Мәҫәлән, Черниковск ҡалаһында һәр бер кешегә семья күләменә ҡарап, йән башына 500 грамм икмәк һатыла.

Партия һәм совет ойошмалары асыҡ совет сауҙаһын киң файҙаланыу буйынса эшлекле етәкселек итергә, совет сауҙаһы принциптарын боҙоу фактыларын бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрергә бурыслылар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ҡайһы бер урындарҙа улар совет сауҙаһы законнарын боҙоуға үҙҙәре юл ҡуйталар. Райком, райсовет һәм башҡа ойошмаларҙың буфеттарында исемлек менән икмәк һәм башҡа азыҡ-түлек продукттары һатыу фактылары йыш ҡына осрай әле. Мәҫәлән, Маҡар районында район сауҙа бүлеге мөдире Ғайнуллин үҙ белдеге менән хеҙмәтсәндәрҙе «яуаплы» һәм «рядовойҙар» тигән категорияларға бүлгән һәм ике төрлө норма билдәләгән. Яуаплы работниктарға 2,5 килограмм, ә башҡаларға 500 грамм икмәк һатыла. Бында райсовет, райком, МВД, суд һәм прокуратура работниктары өсөн ябыҡ ларектар ойошторолған. Шундай етешһеҙлектәр тураһында Ҡыйғы, Мәсетле һәм башҡа райондарҙан да хәбәр итәләр.

[illegible] культуралы совет сауҙаһын булдырыуҙа сауҙа работниктары кадрҙары хәл иткес роль уйнайҙар. Һуңғы ваҡытта, сауҙа селтәре киңәйеү һөҙөмтәһендә, сауҙа ойошмаларына йәш работниктар килде. Бына шуның өсөн дә партия, совет һәм профсоюз ойошмалары сауҙа работниктары кадрҙарын политик тәрбиәләү эшенә большевиктарса тотонорға, уларҙың квалификацияларын күтәрергә, асыҡ культуралы совет сауҙаһын алға ойоштороусыларҙың алдынғы методтарын киң файҙаланырға, сауҙа аппаратына урынлашҡан жуликтарҙы һәм бурҙарҙы аяуһыҙ фаш итеп, сауҙа ойошмаларында большевистик тәртип урынлаштырырға бурыслылар.

С. Мәүлютов.

ВКП(б) Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан сығарылған «АГИТАТОР БЛОКНОТЫНЫҢ» 7-се номеры баҫылып сыҡты.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт опера һәм балет театрында — «ҠАРЛУҒАС». Киске 8 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

Матросов исемендәге кинолала — «КОНЕК-ГОРБУНОК». Олейников, Ковалева һәм башҡа артистар ҡатнашлығында.

Республикан малярия станцияһына Өфө ҡалаһында эшләү өсөн инженер-гидротехниктар талап ителә.

Түбәндәге адреска мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Цюрупа урамы, 71-се номерлы йорт, Республикан малярия станцияһы. Телефон № 2-92-81.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәткәрҙәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26.

НО1670 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

№ 75

1948 йыл

14 апрель

шаршамбы

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

1948 йылдың 7 апрелендә Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә ойошторолған төшкө ашта иптәш И. В. Сталиндең телмәре. (1-се бит).
Финляндия Министрҙар Советы Председателе Мауно Пеккаланан И. В. Сталинға телеграмма. (1-се бит).
Юғары урожай өсөн көрәште тағы ла нығыраҡ көсәйтергә! (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (2-се бит).
Ҡара металлургияның бөтә резервтарын — бишйыллыҡты дүрт йылда үтәүгә! Р. Исхаков. — Стахановсы-техник план — эске резервтарҙы хәрәкәткә килтереү планы ул. С. Пантелеев. — Механизациялаштырыу иҫәбенә. В. И. Рыньков. — Технологияны артабан камиллаштырыу — мөһим бурыс. (3-сө бит).
СССР Финанс Министерствоһында. (3-сө бит).
Р. Колмөхәмәтов. — Яңы сәсеүгә республика культура-ағартыу учреждениеларының бурыстары. (4-се бит).
Ғ. Әхмәтшин. — Колхоз ауылынан хаттар. 3. Яҙғы йыр. (4-се бит).
Колумбиялағы ваҡиғалар. (4-се бит).

МТС-тар сәсеү алдынан

Республикабыҙҙың игенселәре бер нисә көндән юғары урожай өсөн көрәштең иң мөһим этабы булған яҙғы баҫыу эштәренә башлаясаҡтар. Алтай крайы игенселәренең саҡырыуы буйынса колхоз тимерлектәрендә, МТС мастерскойҙарында башланған социалистик ярыш тиҙҙән киң колхоз, совхоз баҫыуҙарына күсәсәк.

Большевиктәр партияһы һәм Совет Хөкүмәте социалистик игенселекте күтәреү өсөн бөтә сараларҙы күрәләр. Юғары урожай яулап алыусы баҫыу батырҙарының намыҫлы хеҙмәтен юғары баһалайҙар. Ошо көндәрҙә генә беҙҙең республиканың ауыл хужалығы алдынғыларынан да 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде һәм 793 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды. Республикабыҙҙың тормошонда булған был ҙур ваҡиға колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктәре араһында көслө хеҙмәт күтәренкелеге тыуҙырҙы. Алдынғы колхоздар һәм машина-трактор станциялары быға сәсеүгә һуңғы әҙерлектәрҙе тамамлау менән яуап бирәләр.

Ағымдағы йылда республикабыҙҙың ауыл хужалығын күтәреүҙә хәл иткес аҙымдар яһалырға, бөтә культураларҙың сәсеү майҙаны үҙған йылға ҡарағанда 433 мең гектарға, ә төп аҙыҡ культураһы булған бойҙай сәсеү ике тапҡырға артырға, бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығы һуғышҡа тиклемге кимәлдән узып китергә. Уларҙы үтәүҙә машина-трактор станцияларына ҙур бурыстар йөкмәтелә. [illegible] Яҙғы баҫыу эштәре осоронда тракторҙар 830 мең гектар ер [illegible]. Был, [illegible] 72 проценты [illegible] 500 мең гектар майҙанда [illegible] 650 мең гектар майҙанда [illegible] эштәре үткәрелергә тейеш.

Яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы [illegible] беренсе нәүбәттә МТС-тарҙың [illegible] бәйләнгән. Трактор паркының баҫыу эштәренә әҙерлеге [illegible] һәр бер тракторҙы тулы көсөндә файҙаланыу һәм һәр бер трактор бригадаһы һәм трактористтың смена заданиеһын [illegible] баҫыу эштәрен [illegible] ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрергә мөмкин.

Яҙғы баҫыу эштәре — механизаторҙар һәм МТС партия ойошмалары өсөн ҙур һынау ул. Ул һынауға тулы әҙерлек менән килергә кәрәк, [illegible] бурысты уңышлы үтәп сығырға [illegible]. Ләкин республикабыҙҙың күп кенә МТС-тары баҫыу эштәренә әҙер түгелдәр әле. Тағылма инвентарҙы ремонтлау менән эш бигерәк тә насар хәлдә тора. [illegible] 67 һәм культиваторҙар ремонтлау 66 процентҡа ғына үтәлгән. Сарман, [illegible] Забельски МТС-тары [illegible] рәүештә эшләйҙәр. Сарман МТС-ында тракторҙарҙың барыһы тик яртыһы ғына ремонтланған, Забельски МТС-ында 7 тракторға әле ремонт башланмаған да. Шуның менән бергә эш сифаты ла түбән. Был МТС-тың етәкселәре бер нисә айҙар буйына эште яҡшыртыуға вәғәҙә итеп киләләр, ләкин хәл үҙгәрмәй. ВКП(б)-ның Воскресен район комитеты һәм район Советы исполкомы МТС-ты был әҙәклектән сығарыу өсөн конкрет саралар күрмәйҙәр.

Үҙған йыл алдан хәстәрлек күрмәү һөҙөмтәһендә күп кенә МТС-тарҙа яғыулыҡ булмағанлыҡтан тракторҙар бик оҙаҡ ваҡыт эшһеҙ ултырҙылар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙа яғыулыҡ ташыу планы иң бары 59 процентҡа ғына үтәлде. Орлов, Чурай, Охлебинин кеүек күп кенә МТС-тар яғыулыҡ ташыу планының яртыһын да үтәмәнеләр.

Сәсеүгә әҙерлектәге был ҙур етешһеҙлектәргә артабан түҙеп торорға мөмкин түгел. Хәҙер һәр бер көн һәм сәғәт ҡиммәт. Баҫыу эштәре башланыуға тиклем ҡалған аҙ ғына ваҡыт эсендә лә бик ҙур эштәр башҡарырға мөмкин. Бик тиҙ көндәрҙә һәр бер МТС-тың тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар ремонтлап бөтөүенә өлгәшергә кәрәк. Стройға инмәй ҡалған бер генә машина ла булмаҫҡа тейеш. Шуның менән бергә трактор бригадаларын комплектовать итеү, трактористәр, прицепщиктәр әҙерләү, күсмә мастерскойҙар ойоштороу, вагончиктәр әҙерләү эштәренә лә ныҡлы иғтибар бирелһен. Һәр бер трактор бригадаһында эш ике сменала ойошторолорға, бының өсөн һәр бер трактор төндә эшләү өсөн электр яҡтыртыу менән тәьмин ителергә тейеш.

Үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа урожайҙы күтәреү, трактор эштәренең сифатын яҡшыртыу, баҫыу эштәрен агротехник сроктарҙа үткәреү һәр бер МТС-тың мөһим бурысы ул. [illegible]

Трактор бригадаларында [illegible] колхоздарҙа [illegible] Социалистик Хеҙмәт Геройы [illegible] трактор бригадаһы [illegible] 183 гектар майҙанда [illegible] 22,07-шәр центнер урожай алды. Дәүләкән МТС-ында Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехин да шундай уҡ уңышҡа өлгәште.

Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларын [illegible]

Баҫыу эштәренә башланыуға [illegible] көндәр ҡалды. [illegible] МТС-тар, трактор бригадалары һәм тракторсылар [illegible] заданиеларҙы үтәлеүсә, эштең сифатына [illegible] етешһеҙлектәрҙе эш барышында аныҡлап бөтерергә кәрәк.

МТС партия ойошмалары баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн механизаторҙар араһында социалистик ярыш ойоштороп, һәр бер трактор бригадаһының һәм трактористың смена заданиеһын арттырып үтәүен, тракторҙар паркының тулы көсөндә, бер туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итергә бурыслылар.

1948 йылдың 7 апрелендә Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы хөрмәтенә ойошторолған төшкө ашта

иптәш И. В. СТАЛИНДЕҢ телмәре

Мин Советтәр Союзы менән Финляндия араһында дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙамлашыу тураһындағы кисә ҡул ҡуйылған Договорҙың әһәмиәте хаҡында бер нисә һүҙ әйтергә теләр инем.

Был Договор беҙҙең илдәребеҙ араһындағы мөнәсәбәттәрҙә боролошто билдәләй. Россия һәм Финляндия араһындағы мөнәсәбәттәрҙә 150 йыл буйына үҙ-ара ышанмаусылыҡ йәшәгәнлеге билдәле. Финдәр рустарға, ә рустар финдәргә ышанмаусылыҡ менән ҡаранылар. Элек Советтәр Союзы яғынан рустар һәм финдәр араһында йәшәп килгән ышанмаусылыҡты емерергә тырышып ҡаралды. Был хәл 1917 йылда Ленин Финляндияны бойондороҡһоҙ тип иғлан иткән саҡта булғайны. Тарихи ҡараш нөктәһенән ҡарағанда был күренекле акт булды. Ләкин, үкенескә ҡаршы, бының менән ышанмаусылыҡ емерелмәне — ышанмаусылыҡ ышанмаусылыҡ булып ҡалды. Һөҙөмтәлә беҙҙең арабыҙҙа ике һуғыш булды.

Оҙаҡҡа һуҙылған үҙ-ара ышанмаусылыҡ осоронан—беҙ бер беребеҙ менән ике тапҡыр һуғышҡан осорҙан — мин беҙҙең мөнәсәбәттәребеҙҙә яңы осорға — үҙ-ара ышаныу осорона күсеүебеҙҙе теләр инем. Беҙҙең тарафтан төҙөлгән Договор ошо ышанмаусылыҡты емерергә һәм беҙҙең халыҡтарыбыҙ араһындағы мөнәсәбәттәр өсөн яңы нигеҙ тыуҙырырға, һәм ике ил араһындағы мөнәсәбәттәрҙә ышаныс һәм дуҫлыҡ яғына табан ҙур боролошто аңлатырға тейеш.

Беҙ быны ошо залда ҡатнашыусылар ғына түгел, бәлки Финляндияның булһын, шулай уҡ Советтәр Союзының ошо залдан тыштағы бөтә кешеләренең дә яҡшы аңлауын теләйбеҙ.

Халыҡтар араһындағы ышанмаусылыҡты тиҙ генә бөтерергә мөмкин тип уйларға ярамай, быны тиҙ генә эшләү мөмкин түгел. Ышанмаусылыҡтың ҡалдыҡтары, ҡойроҡтары оҙаҡ ваҡыттар һаҡланып ҡалалар, уларҙы бөтөрөү өсөн, СССР менән Финляндия араһында үҙ-ара дуҫлыҡ традицияларын булдырыу өсөн күп эшләргә һәм көрәшергә, был традицияларҙы нығытырға кәрәк.

Тиң хоҡуҡлы һәм тиң булмаған хоҡуҡлы договорҙар була. Совет-Финляндия Договоры тиң хоҡуҡлы Договор, сөнки ул һәр ике яҡтың тулыһынса тиң хоҡуҡлы булыуы нигеҙендә төҙөлдө.

Ҙур һәм бәләкәй милләттәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙең тиң хоҡуҡлы була алыуына күп кешеләр ышанмайҙар. Ләкин беҙ, совет кешеләре, бындай мөнәсәбәттәр булырға тейештәр һәм була алалар, тип иҫәпләйбеҙ. Совет кешеләре, бер милләттең, ҙур һәм бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, бары бер үҙенең сифат үҙсәнлектәре бар һәм бары тик үҙенә генә хас булған, башҡа милләттәрҙә булмаған спецификаһы бар, тип иҫәпләйҙәр. Был үҙсәнлектәр һәр бер милләт тарафынан бөтә донъя культураһының дөйөм хазинаһына индерелә торған, уны тулыландыра һәм байыта торған вклад булып тора. Был йәһәттән бөтә милләттәр — ҙурҙары ла, бәләкәйҙәре лә бер дәрәжәлә торалар, һәм милләт булыу яғынан башҡа теләһә ниндәй милләткә тиң.

Шуға күрә совет кешеләре, Финляндия, бәләкәй ил булыуына ҡарамаҫтан, был Договорҙа Советтәр Союзына ҡарата тиң хоҡуҡлы ил булып тора, тип иҫәпләйҙәр.

Бөйөк державаларҙың бәләкәй милләттәрҙе ҙур милләттәр менән тиң хоҡуҡлы итеп ҡараусы политик деятелдәре күп табылмаҫ. Уларҙың күптәре ваҡ милләттәргә юғарынан, өҫтән тороп ҡарай. Улар ҡайһы бер саҡта ваҡ милләттәр өсөн бер яҡлы гарантия биреүгә лә ҡаршы түгелдәр. Ләкин был деятелдәр, дөйөм итеп әйткәндә, ваҡ милләт менән тиң хоҡуҡлы договорҙар төҙөмәйҙәр, сөнки ваҡ милләттәрҙе үҙҙәренең партнерҙары тип иҫәпләмәйҙәр.

Мин Совет-Финляндия Договоры өсөн, беҙҙең илдәребеҙ араһындағы мөнәсәбәттәрҙә яҡшылыҡҡа табан боролошто аңлатыусы Договор өсөн тост күтәрәм.

ЮҒАРЫ УРОЖАЙ ӨСӨН КӨРӘШТЕ ТАҒЫ ЛА НЫҒЫРАҠ КӨСӘЙТЕРГӘ!

Яңы йөкләмәләр

БАЙМАҠ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларының ҙур бер отрядын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһындағы СССР Верховный Советы Президиумының Указын районның колхозсылары һәм МТС работниктәре ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Улар был наградаға быйыл үҙған йылға ҡарағанда ла мулыраҡ урожай үҫтереп алыу менән яуап биреү өсөн үҙҙәренә тағы ла юғарыраҡ йөкләмәләр алалар.

Карл Маркс исемендәге колхоз члендәре күптән түгел генә тәжрибәле звеновод Ғиниәт Ғәлиәкбәр улы Насыровҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү тураһындағы шатлыҡлы хәбәрҙе алғайнылар, радио уларға тағы ла яңы ҙур шатлыҡ килтерҙе. Звеновод Нурия Үҙәнбаева, колхозсыларҙан Фәтхислам Үҙәнбаев, Ғүмәр Исчурин иптәштәрҙең Ленин ордене, баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Хәбиб Әхмәтов, колхозсы Ғәбделхәй Әхмәтов, Нурия Исчурина һәм башҡа иптәштәрҙең «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене һәм медалдәр менән наградланыуҙары тураһындағы хәбәр колхозсылар тарафынан ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршыланды.

Баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Хәбиб Әхмәтов иптәш наградаға яуап итеп, сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары сифатлы итеп үткәрергә, 20 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 30-ар центнер, 10 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 32-шәр центнер, ҡалған 281 гектар майҙанда 100-әр бот урожай алырға һүҙ бирҙе.

Иптәш Үҙәнбаева звеноһы быйыл 10 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 202-шәр бот урожай үҫтереп алырға йөкләмә алды.

И. Зарипов.

Герой етәкселек иткән трактор бригадаһында

Социалистик Хеҙмәт Геройы Тихон Егорович Алехин етәкселек иткән Дәүләкән МТС-ының трактор бригадаһы үҙған йыл «Новая жизнь» колхозында эшләп, юғары урожай үҫтереп алыуҙа бик ҙур ярҙам күрһәткәйне.

Был бригада быйыл да ошо уҡ колхозды хеҙмәтләндерәсәк. Иптәш Алехинға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү айҡаһлы бригада члендәре һәм колхозсылар араһында ҙур күтәренкелек тыуҙы. Трактористәр быйыл тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхозда яҙғы баҫыу эштәрен 18 эш көнөндә тамамларға, һәр бер шартлы тракторға 900-әр гектар ер эшкәртергә һәм бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 25—30 центнер урожай үҫтереп алырға һүҙ бирҙеләр.

Бригадалағы ике трактор ҙа яҡшы сифатлы итеп ремонтланды һәм күптән үк колхозға килтерелде. Бөтә баҫыу эштәренә етерлек яғыулыҡ әҙерләнде. Трактористәрҙең вагончиге яҡшы итеп йыһазландырылды. Трактористәр баҫыу эштәренең башланыуын түҙемһеҙлек менән көтәләр.

Р. Суфиянов.

Сәсеүгә әҙерлекте тамамлау менән яуап бирәләр

ЙОМАҒУЖА. (Телеграф аша). Холайбирдин МТС-ы (директоры иптәш Костылев) механизаторҙары республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм ордендәр, медалдәр менән наградлау тураһындағы Указдарға яуап итеп, быйыл МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙың бөтә баҫыуҙарында ла мул урожай үҫтереүҙе бурыс итеп ҡуйҙылар.

МТС яҙғы баҫыу эшенә тулыһынса әҙер. Яҙғы эш сезоны өсөн талап ителгән 136 тонна урынына, 140 тонна яғыулыҡ әҙерләнде, бөтә ремонт эше срогынан алда тамамланды. Ремонттың сифаты ике тапҡыр тикшерелде һәм ҡәнәғәтләнерлек, тип табылды.

Хәҙер барлыҡ 62 трактор, 64 һабан, 10 культиватор һәм 24 сәскес колхоздарға илтеп ҡуйылды. Ағиҙел арьяғындағы колхоздарҙы хеҙмәтләндереүсе бригадалар эш урынына беренсе нәүбәттә ебәрелделәр. МТС-тағы 23 бригаданың да запас частәр һәм бәләкәй мастерскойҙар менән тәьмин ителеүенән тыш, өлкән механик Мартынов етәкселегендә күсмә мастерской эшләйәсәк.

Ф. Ғималетдинов.

13 комбайн ремонтланды

Шаран МТС-ы механизаторҙары тракторҙар паркын сәсеүгә әҙерләүҙе уңышлы тамамлау менән бергә, комбайндар ремонтлау эшенә лә ныҡлы иғтибар бирәләр. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 13 комбайн һәм 16 комбайн моторы ремонтланды.

Үҙған йыл «Сталинец» комбайны менән 600 гектар майҙандың урожайын йыйнаған Токарев һәм Кобызев иптәштәр быйыл 1000 гектар, комбайнерҙарҙан Әхмәдуллин һәм Галин иптәштәр 600-әр гектар майҙандың урожайын йыйнарға йөкләмә алдылар.

Ф. Дашкова.

Өфөлә А. Н. Островский көндәре

ВКП(б)-ның ҡала комитеты һәм Башҡортостан совет яҙыусылары Союзы 12 апрелдә искусство работниктәренең, яҙыусыларҙың ҡала общественносе менән берлектә, рус халҡының бөйөк драматургы А. Н. Островскийҙың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған ҙур йыйылышын үткәрҙе. Совет халҡының һөйөклө драматургын хөрмәтләү өсөн килеүселәр менән филармония залы тup-тулы булды.

Тантаналы ултырышта бөйөк драматургтың ижады тураһында педагогия институтының доценты иптәш М. Г. Пизов доклад һөйләне.

Официаль өлөштән һуң рус драм театры, опера-балет театры һәм филармония артистәре көстәре менән ҙур концерт бирелде. Концертта А. Н. Островский пьесаларынан өҙөктәр һәм уның әҫәрҙәренә ҡарата яҙылған көйҙәр башҡарылды.

* * *

Башҡорт академия театры А. Н. Островскийҙың тыуыуына 125 йыл тулыуға ҡарата драматургтың «Бирнәһеҙ ҡыҙ» пьесаһын ҡуйҙы. Спектаклде режиссер Ҡ. Х. Бакиров ҡуйған. Төп образдарҙы башҡарыуҙа РСФСР-ҙың атҡаҙанған артистәре—З. Бикбулатова, Б. Иосопова, А. Мөбәрәков, Башҡортостандың атҡаҙанған артистәре—Р. Сыртланов, Ғ. Яҡупов иптәштәр ҡатнаштылар.

* * *

Башҡортостан радиокомитеты юбилей уңайы менән махсус тапшырыу ойошторҙо. Микрофон алдында А. Н. Островскийҙың «Бирнәһеҙ ҡыҙ» пьесаһынан икенсе пәрҙә тапшырылды. Тапшырыуҙа Башҡорт академия театрының артисткалары һәм артистәре ҡатнаштылар.

ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ.


В. Е. Щенячев — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,97-шәр центнер бойҙай урожайы алды.

В. М. Жолобецкий — Дәүләкән МТС-ының механигы. Был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

М. А. Букин — Дәүләкән МТС-ы комбайнеры. Был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

Е. А. Сергеев — Дәүләкән МТС-ының участка механигы. Был МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

Р. Х. Әхмәдиев — Дәүләкән МТС-ы директорының политик эш буйынса урынбаҫары. МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 610 гектарының һәр гектарынан 21,53-әр центнер арыш урожайы алынған.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Министрҙар Советы Председателе Генералиссимус ИОСИФ ВИССАРИОНОВИЧ СТАЛИН әфәндегә

Финляндия Хөкүмәт Делегацияһы Ватанына ҡайтып етеү менән, Генералиссимус әфәнде, Һеҙгә һәм Совет Хөкүмәтенә беҙҙең Мәскәүҙә булған сағыбыҙҙа уның юғары баһаланырлыҡ шат ҡабул итеүе һәм ҡыйылмаҫ бай тәьҫирҙәр ҡалдырған ҡунаҡсыл ҡабул итеүе өсөн тәрән рәхмәт белдереүеү ҡабул итеүҙе һорай.

Финляндия Министрҙар Советы Председателе
Мауно ПЕККАЛА.

Башкорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Совете Президиумы

УКАЗЫ

„Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медале менән

(Аҙағы. Башы газетабыҙҙың 72, 73, 74-се номерҙарында).

1. Пимен Кузьмич Аблицовты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
2. Фатима Мостафа ҡыҙы Азаматованы — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
3. Алексей Федотович Азановты — Әлмөхәмәт МТС-ы тракторисе.
4. Анна Михайловна Алексееваны — Мишкә районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
5. Вячеслав Александрович Алексеевте — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
6. Николай Андреевич Александровты — Дәүләкән районы Париж коммунаһы исемендәге колхоздың колхозсыһы.
7. Анна Хисмәт ҡыҙы Алтынбаеваны — Бөрө районы «Сулпан» колхозы колхозсыһы.
8. Никита Алтынбай улы Алтынбаевты — Бөрө районы «Сулпан» колхозы колхозсыһы.
9. Пәнилә Алтынбай ҡыҙы Алтынбаеваны — Бөрө районы «Сулпан» колхозы колхозсыһы.
10. Хәстинмал Ғәйзетдин ҡыҙы Әмироваҙы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
11. Шәмси Ғәлиәскәр улы Аскаровты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
12. Анастасия Григорьевна Афанасьеваны — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
13. Абуҙар Мәрҙан улы Ахияровты — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
14. Әлип Әхмәтовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
15. Мәлика Хәйретдин ҡыҙы Әхмәтованы — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
16. Ирһылыу Бәйгилде ҡыҙы Бәйгилдинаны — Ҡалтасы районы Крупская исемендәге колхоздың колхозсыһы.
17. Екатерина Филипповна Бакаеваны — Дәүләкән районы «На страже» колхозының колхозсыһы.
18. Леонид Трифонович Балашовты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
19. Яков Ильич Банниковты — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
20. Калитодина Степановна Баранованы — Мишкә районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
21. Мулланур Басим улы Басимовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
22. Василий Филиппович Белоусовты — Өфө районы «Парижская коммуна» колхозының колхозсыһы.
23. Агафья Константиновна Беляеваны — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
24. Федот Федорович Борисовты — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
25. Надежда Егоровна Бесованы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозы колхозсыһы.
26. Хәлим Әхмәт улы Вәлиевте — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
27. Геннадий Васильевич Бикуловты — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
28. Анна Алексеевна Волочушкинаны — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
29. Әхәт Ғәбдрахмановты — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
30. Мәлимә Ғәбдрахманованы — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
31. Анастасия Николаевна Гавриловаӈы — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.
32. Бәҙәриҫә Ғиниәт ҡыҙы Ғәзелшинаны — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
33. Гәүһә Сәйфәр ҡыҙы Ғәйнетдиноваӈы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
34. Шәмсетдин Ғәйнетдин улы Ғәйнетдиновты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
35. Дина Исламетдин ҡыҙы Галинаны — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
36. Исламетдин Абзалтдин улы Галинде — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
37. Сәлимә Кашап ҡыҙы Ғәлимованы — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
38. Хәнифә Ғәлинуровани — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
39. Фараз Мостафа улы Ғәләүевте — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
40. Хәбибулла Лоҡман улы Ғирфановты — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.
41. Мәликә Рабартдин ҡыҙы Ғиләжеваны — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.
42. Елена Васильевна Глазкованы — Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоздың колхозсыһы.
43. Наталия Андреевна Гончарҙы — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
44. Пелагея Куприяновна Горбенкоӈы — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
45. Александра Поликтовна Горькованы — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
46. Анна Яковлевна Гречиноны — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.
47. Иван Николаевич Гурьевте — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.
48. Аверьян Егорович Гусевте — Әлмөхәмәт МТС-ының трактористе.
49. Мәликә Дәүли ҡыҙы Дәүлиеваны — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.
50. Фәзли Дәүли улы Дәүлиевте — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.
51. Азалия Дускаеваны — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.
52. Федора Егоровна Евстифееваны — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
53. Васса Михайловна Егупованы — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
54. Александра Семеновна Жукованы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
55. Анна Михайловна Зайцеваны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
56. Евгения Никитична Захарованы — Дәүләкән районы «На страже» колхозының колхозсыһы.
57. Тимофей Дмитриевич Зеркаловты — Дәүләкән районы Парижская коммуна исемендәге колхоздың колхозсыһы.
58. Прасковья Фроловна Зиминаны — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
59. Николай Николаевич Зоновты — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
60. Фәриҙә Мөхип ҡыҙы Зариповаӈы — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.
61. Илсҡай Идулбаевич Идулбаевты — Ҡалтасы районы «Красный Таңып» колхозының колхозсыһы.
62. Вәли Изибаевты — Яңауыл районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.
63. Исай Исаевич Исланаевты — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.
64. Нәзирә Иҙмәтдин ҡыҙы Исламованы — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
65. Шәмси Фәтхи улы Исламовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
66. Барки Ислибаевна Ислибаеваны — Ҡалтасы районы Крупская исемендәге колхоздың колхозсыһы.
67. Хәҙисә Шәйсадр ҡыҙы Исмәғиловаӈы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
68. Әблхәй Әбләлғәлим улы Ишмөрәтовты — Маҡар районы «Өлкәр колхозының колхозсыһы.
69. Ихсан Ишмөрҙә улы Ишмөрҙиндe — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.
70. Павел Артемьевич Казаковты — Благовещен районы «Буря» колхозының колхозсыһы.
71. Харис Шәйхислам улы Камаловты — Әбйәлил районы «Яңы тормош» колхозының колхозсыһы.
72. Рәшит Фәттәх улы Ҡарағуловты — Әбйәлил районы «Яңы тормош» колхозының колхозсыһы.
73. Тутан Йософ ҡыҙы Кәримованы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
74. Екатерина Михайловна Климинаны — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
75. Наталия Евлампьевна Климинаны — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
76. Павел Иванович Климинде — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
77. Яков Андреевич Климинде — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
78. Ғилман Асмандияр улы Ҡылысовты — Баймаҡ районы Хәҙәйбирҙин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
79. Иван Лаврентьевич Князевте — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
80. Леонид Михайлович Князевте — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
81. Николай Трофимович Колесниковты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы.
82. Василий Поливеевич Коробовты — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
83. Анна Гавриловна Косаеваны — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
84. Михаил Андреевич Косатухинде — Ҡалтасы районы «Азия» колхозының колхозсыһы.
85. Елена Михайловна Костареваны — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
86. Михаил Александрович Костаревте — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
87. Степан Петрович Кремешныйҙы — Стәрлетамаҡ МТС-ының тракторисе.
88. Петр Иванович Кудрявцевте — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
89. Александра Михайловна Куринкованы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
90. Федор Григорьевич Куринковты — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
91. Ксения Ивановна Латохинаны — Әбйәлил районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
92. Елена Васильевна Лебедеваны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
93. Василий Михайлович Левкинде — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.
94. Матрена Андреевна Левкинаны — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.
95. Алексей Осипович Леонтьевте — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
96. Константин Осипович Леонтьевте — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
97. Владимир Васильевич Литвиновты — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
98. Сергей Нестерович Лысенконы — Стәрлетамаҡ МТС-ы комбайнеры.
99. Таһирбирҙе Мөьмин улы Мәжитовты — Баймаҡ районы «Урғаҙа» колхозының партия ойошмаһы секретаре.
100. Пелагея Михайловна Маргасованы — Яңауыл районы Свердлов исемендәге колхоздың колхозсыһы.
101. Степан Максимович Маркинде — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
102. Константин Фомич Меркушевте — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.
103. Фәрит Бахтияр улы Мифтаховты — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының колхозсыһы.
104. Зоя Григорьевна Москвинаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
105. Лукерия Григорьевна Москвинаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
106. Петр Иванович Москвинде — Баҡалы районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
107. Ольга Саватеевна Мосуновани — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
108. Алексей Степанович Музалевты — Баҙаҡ МТС-ының учетчиге.
109. Хәлимә Шаҡур ҡыҙы Муллағалинаны — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.
110. Хисмәт Насип улы Морзағилдинде — Маҡар районы «Өлкәр» колхозының колхозсыһы.
111. Әүхәт Мөсәллим улы Мөсәлиповты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
112. Нәрми Мөхәмәтовты — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозы колхозсыһы.
113. Рәүиә Шәриф ҡыҙы Мөхәмәтхановаӈы — Яңауыл районы «Коммунар» колхозы колхозсыһы.
114. Заҡирә Мөхәмәтшинаны — Әбйәлил районы «Яңы тормош» колхозының колхозсыһы.
115. Шакир Мифтаховты — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозы колхозсыһы.
116. Хәмит Миргәли улы Нагаевты — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
117. Гөльямал Ғәтаулла ҡыҙы Нәжмиеваны — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
118. Бибиә Сөләймән ҡыҙы Насибуллинаны — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.
119. Иван Иванович Натаденконы — Стәрлетамаҡ МТС-ының трактористе.
120. Сергей Прокопьевич Никоновты — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
121. Лидия Александровна Новоселованы — Бөрө районы «Березовый ключ» колхозының колхозсыһы.
122. Федор Иванович Норинде — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
123. Ғилминур Фазыл ҡыҙы Нуриәхмәтованы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
124. Фәхретдин Нуриәхмәт улы Нуриәхмәтовты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
125. Мәрйәм Нурлығаяновани — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.
126. Петр Григорьевич Овчинниковты — Баҙаҡ МТС-ы учетчиге.
127. Иван Петрович Осинцевте — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
128. Константин Петрович Осинцевте — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
129. Юлия Васильевна Парываеваны — Ҡалтасы районы «Азия» колхозының колхозсыһы.
130. Григорий Прокофьевич Перепелецкийҙе — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
131. Анна Павловна Пивоварованы — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
132. Мария Степановна Плотникованы — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
133. Гаврил Гаврилович Позолотинде — Баҙаҡ МТС-ының тракторисе.
134. Александра Степановна Попкованы — Мишкә районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
135. Дмитрий Попковты — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
136. Мөслимә Ғәбдрашит ҡыҙы Рәшитованы — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.
137. Роза Исхаҡ ҡыҙы Рысбаеваны — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
138. Таяғат Токи улы Рәжәповты — Благовар районы «Һабансы» колхозының колхозсыһы.
139. Бибиямал Ғәләүетдин ҡыҙы Сабированы — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
140. Нина Васильевна Сазоноваҙы — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
141. Сайсан Сайдуганович Сайдугановты — Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.
142. Тамилә Инсафетдин ҡыҙы Салахованы — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
143. Федосия Степановна Самойлованы — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
144. Лидия Ивановна Самонинаны — Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозының колхозсыһы.
145. Леонид Александрович Сандаловты — Ҡалтасы районы «Азия» колхозының колхозсыһы.
146. Баян Сафи улы Сафинде — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
147. Ғатуф Хәмәтсафи улы Сафинде — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
148. Фәниә Тәхбәтулла ҡыҙы Сәфиуллинаны — Дәүләкән районы Каганович исемендәге колхоздың колхозсыһы.
149. Ғафиә Сәхрәт ҡыҙы Сәхратованы — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
150. Дмитрий Трофимович Сачковты — Дәүләкән районы Ленин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
151. Мәрфуға Ғиниәт ҡыҙы Сирбаеваны — Баймаҡ районы «Урғаҙа» колхозының колхозсыһы.
152. Анна Денисовна Смолинаны — Ҡалтасы районы «Азия» колхозының колхозсыһы.
153. Мария Дмитриевна Стоянованы — Дәүләкән районы «1 май» колхозының колхозсыһы.
154. Кирилл Алексеевич Суповты — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
155. Николай Николаевич Тарасовты — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
156. Тамара Ильинична Тарасованы — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
157. Клавдия Константиновна Телятникованы — Әбйәлил районы Сталин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
158. Анна Викторовна Теняковани — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
159. Тимеркәй Тимербаевты — Яңауыл районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.
160. Дмитрий Васильевич Токаревте — Бөрө районы «Урал» колхозының колхозсыһы.
161. Варвара Кузьминична Трифонованы — Өфө районы «Парижская коммуна» колхозының колхозсыһы.
162. Мария Игнатьевна Трофимецте — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
163. Ғәйдулла Шәйәхмәт улы Тубалбаевты — Баймаҡ районы Хәҙәйбирҙин исемендәге колхоздың колхозсыһы.
164. Мәсғут Хәсән улы Тупяковты — Благовар районы «Һабансы» колхозының колхозсыһы.
165. Ғайдалиф Ғәйнетдин улы Уразметовты — Благовар районы «Һабансы» колхозының колхозсыһы.
166. Шәйдулла Шәйдинур улы Уразметовты — Благовар районы «Һабансы» колхозының колхозсыһы.
167. Әсхәт Миңнеғәли улы Усмановты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
168. Миңнисә Йыһангир ҡыҙы Фәйзуллинаны — Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозының колхозсыһы.
169. Нурикамал Ғәзизулла ҡыҙы Фәйзуллинаны — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
170. Хәмит Фәрдиевте — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.
171. Мөғәллим Фәткелбаян улы Фәтиховты — Кушнаренко районы «Коминтерн» колхозының колхозсыһы.
172. Закир Хәбировты — Яңауыл районы «Үрнәк» колхозының колхозсыһы.
173. Миңнеян Миңнеәхмәт улы Хәеровты — Благовар районы «Һабансы» колхозының колхозсыһы.
174. Рәхим Хәйерлеуара улы Хәйерлеуаринде — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
175. Мөнәүәрә Хәлиуллинаны — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
176. Фәрхәнә Хәмзинаны — Яңауыл районы «Коммунар» колхозының колхозсыһы.
177. Сатирә Хәмидулла ҡыҙы Хәмидуллинаны — Дүртөйлө районы «Ильдус» колхозының колхозсыһы.
178. Ғөлсөм Сабит ҡыҙы Хисмәтованы — Әбйәлил районы «Яңы тормош» колхозының колхозсыһы.
179. Хәбибъямал Таһир ҡыҙы Хушмөхәмәтованы — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
180. Александра Сергеевна Чашевуеваны — Өфө районы Буденный исемендәге колхоздың колхозсыһы.
181. Федор Кириллович Черепенькинде — Әбйәлил районы «Серп» колхозының колхозсыһы.
182. Анисия Ивановна Черкенконы — Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхоздың колхозсыһы.
183. Елизавета Константиновна Черникованы — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
184. Наталия Николаевна Чуклинаны — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
185. Әғзәм Шакир улы Шамбазовты — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
186. Маһира Сәлимъян ҡыҙы Шамбазованы — Ҡырмыҫҡалы районы Чапаев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
187. Шайктен Шамкаевты — Яңауыл районы Чкалов исемендәге колхоздың колхозсыһы.
188. Рәдиф Таһир улы Шәрифьяновты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
189. Әнәс Таһир улы Шәрифьяновты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
190. Нуретдин Шафиҡ улы Шафиковты — Туймазы районы «Булак-тау» колхозының колхозсыһы.
191. Михаил Павлович Шендрикте — Маҡар районы «Восток» колхозының колхозсыһы.
192. Ананий Сергеевич Шестобитовты — Бөрө районы «Красный Октябрь» колхозының колхозсыһы.
193. Прокофий Семенович Шестопаловты — Аслыкүл МТС-ының тракторисе.
194. Феактиса Михайловна Шубинаны — Благовещен районы «Буря» колхозының колхозсыһы.
195. Александра Васильевна Щекачеваны — Баймаҡ районы «Красная дружина» колхозының колхозсыһы.
196. Маһикамал Ситдиҡ ҡыҙы Юлдашбаеваны — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
197. Һөйөнлөк Ситдиҡ улы Юлдашбаевты — Баймаҡ районы Маркс исемендәге колхоздың колхозсыһы.
198. Ихсан Муллағәли улы Юсуповты — Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоздың колхозсыһы.
199. Пиксылы Ямбулатовна Ямбулатованы — Мишкә районы «Трактор» колхозының колхозсыһы.
200. Миксон Ядимирович Ядимировты — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.
201. Фазлей Янсубаевич Янсубаевты — Бөрө районы «Сулпан» колхозының колхозсыһы.

СССР Верховный Совете Президиумының Председателе
Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Совете Президиумының Секретаре
А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
1948 йыл 2 апрель.

Кара металлургияның бөтә резервтәрен — биш йыллыкты дүрт йылда үтәүгә!

Механизациялаштырыу иҫәбенә

Металлургия комбинаты цехтарында ниндәй цехтар, агрегаттар, уңай хужалыктары, тимер юлы күп механизациялаштырыу саралары тормошка ашырыуҙы талап итәләр. Быға тиклем комбинатттың рентабелле эшләмәүе механизмдарҙы насар файҙаланыуҙан һәм хеҙмәт күп талап итеүсе эштәрҙе вә кул хеҙмәте механизациялаштырылмауҙан килә. Үткән йыл ошо бурысты хәл итеү юнәлешендә байтак эш башкарылды.

Айырым цехтарҙа күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу буйынса тормошка ашырылған 70-тән артык тәҡдим комбинатка 5 миллион һум ҡына иҡтисад бирҙе. Мәҫәлән, облаҙарҙағы шлактарҙы тиҫәүҙе хәҙер эске 50 кеше башкара ине. Хәҙер эштәрҙе махсус механизм бер нисә кеше генә башкара. Был сара 280 мең һумлык экономия бирә. Запруддағы станцияһында күмер тейәү хеҙмәткә күп кеше күсереләне механизмға һәр бер дүрт кешенән торған 16 бригаданы алмаштырҙы. Был механизм 61 кешенең хеҙмәтен үтәп, кешегә хеҙмәтте етештереүсәнлегене тағы ла күтәрҙе.

Быйыл комбинат коллективе алдында социалистик йөкләмәләрҙе үтәү өсөн күп механизация индереү кәрәклеген алға куя. Хәҙер комбинаттың инженер-техниктары, эшсе һәм мастерҙары был бурысты хәл итеү өсөн тырышлык менән эшләйҙәр.

Оҫта цехы хеҙмәткәрҙәре генә мартен цехында нефтебохный насос ҡуйыу, домна цехында — үлгәнде ҡуйыу эштәрен тамамланы. Шулай уҡ запруддағы станцияһында — таш күмерҙе тейәү өсөн механизмдар индерелде. Был сара заводтың һәм цехтарҙың эшен байтак еңеләйтер.

Комбинат коллективе ҡабул иткән стахановсы-техник планында уйланылған сараларҙы тормошка ашырыу комбинат алдындағы бурыстарҙы хәл итеүҙә ҙур ярҙам итер. Был сараларҙы тормошка ашырғанда, 1948 йылда комбинат алдындағы бурыстарҙы хәл итеүҙә ҙур аҙым яһаласаҡ.

С. Пантелеев,
комбинаттың механизация бүлегенең етәксеһе.

Иҫкәргә фекергә киң юл

Эшселәр, специалистар инициативаһын менән йыйылған үйлап сығарыу һәм рационализация тәкдимдәре Белорет металлургия комбинатын эшендә ҙур серьез роль уйнай. Үткән йыл был комбинат буйынса тормошка ашырылған рационализатор тәкдимдәр һаны 246 ға етте, улар производствоға 2 миллион 245 мең һум экономия килтерҙе. Тик металлургия заводында тормошка ашырылған 103 тәкдим 1 миллион 543 мең 778 һум экономия алынды. Ижади инициативаның күрһәтеүсәләре производствоның артыуында 77.876 һум аҡса тулды.

Ленинград предприятиеләре сағыштырыу айканлы тыуған хеҙмәт күтәрелешен эштә сығарыу эшендә ҙур уңыштар, дәрт уятты. Прокат цехының начальнигы, инженер иптәш Плоховтың һуңғы йылдарҙа биргән тәкдимдәре бер миллиондан ашыу һум файҙа бирҙе. Комбинатта үйлап сығарыу эше менән һөйөп шөғөлләнеүсе Скурлатов, Коваленко кеүек намыслы специалистар аҙ түгел.

Быйыл үйлап сығарыу һәм рационализация тәкдимдәрен тормошка ашырыу, миллионлап һумлык экономия алыу саралары билдәләнде. Хәҙер был эш менән шөғөлләнеүсе саралары тағы ла киңәйтә бара. Рационализаторҙарҙың ижади һәләтен тағы ла үҫтереү зарур. Комбинаттағы 1947 йылда күрһәтелгән техник тәкдимдәрҙең алынған саҡтағы күпселеге. Мәҫәлән, Рябов, Сафонов кеүек ижади инициатива күрһәткән иптәштәр үҙҙәренең тәкдимдәрен индереү алдында.

Белорет комбинатының рентабелле эшләүе өсөн бөтә коллективтың ижади производствоға һәм ижади көсөн күтәреүгә бәйле. Инженерҙарҙың мастерҙарҙың, алдынғы эшселәрҙең һөнәрен бөтә коллективтың көрәше һәм баһалары был эштә уңышлы булыуға бөтә бурысы хәл итеүгә ярҙам итер.

Ф. Ф. Шакиров,
комбинаттың үйлап сығарыу һәм рационализация бүлегенең начальнигы.

Стахановсы-техник план — эске резервтәрҙе хәрәкәткә килтереү планы ул

Прокат цехы коллективе сталинсе яңы биш йыллыктың икенсе йылының планын уңышлы үтәп, биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн ленинградлылар тарафынан башланған данлыклы ярышка ҡушылды.

Беҙ бөтәбеҙҙән элек, биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн эске мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алдык һәм уларҙы файҙаланыу юнәлешендә стахановсы-техник планды төҙөнек. Унда производствоға механизация һәм рационализация индереү буйынса байтак саралар билдәләнде.

Мәҫәлән, прокат сутунка киҫәктәрен ваклап бирерү механизмын үҙгәртеп ҡороу саралары каралған. Был бурысты бер үк вакытта стелажҙарҙың ойошторолғанлығын, тәлгәнлеген артабан арттырыу менән кайсыларҙың икеләнәүен үҫтерергә, аҙ сығымдар менән уны уҙ алдына эшләтеү кеүек өҫтәлмә бурыстар күҙ уңында тотола. Ә стелажҙарҙың ойошторолғанлығын арттырыу механизмын үҙгәртергә, уны тиҙләтеү менән хәл ителә. Былар бөтәһе лә прокаттың инженерҙар тормошка ашырылды. Нәтижәлә прокатка ярашлы рәүештә был эштә прокат станының етештереүсәнлеге арттырыла.

Икенсе номерле мейескә яңы конструкциялы өҫтәлмә ҡуйыу тәҡдимен тормошка ашырыу мөхите тиҙлек күтәргән «Гриос» станының етештереүсәнлеген арттырасаҡ. Өс күперлә кранлар күпер менән катанкаларҙы тейәү-бушатыу эшен механизациялаштырыу һәм шулай уҡ тейәү-бушатыу эшләүсәнлеген хеҙмәтен еңеләйтеү һәм уны бөтә-бөтөнләй кыҫкартыуға мөмкинлек бирәсәк.

Производствоға механизация һәм рационализация индереүгә юнәлтелгән байтак тәҡдимдәр егерменән күберәк. Шулай уҡ станов цехтарҙың байтак эшен юнәлтелгән чаралар төҙөлгән.

Былар ҙа ҙур сарыларҙың стахановсы-техник планда ярашлы, электр энергияһы, металлы, инструмент, эргәләр техник материалдарҙы файҙаланыу нормаларҙы, уларҙы экономия яһау сараларҙы, дирекцияһы, тәьминаты, баш механика һәм энергетик бүлектәренең улар менән тейеш эшен ойоштороу саралары билдәләнгән.

Хәҙер инде цех коллективе был планды тормошка ашырыу өсөн ныклап эшләй. Яңы йылда түгел, өҫтәлмә коллектив алдында ҙур эш тора. Сөнки был йылда сифатлы, тик катанка һәм сутунка бирергә тейеш. Цехтың был уңышы ВЦСПС һәм Министрлыктың күсмә Кызыл байрағына лайыҡ булыуы менән дә билдәләнә.

Биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн ярышта мастерҙар А. Лаппа, Д. Шилкин, М. Нужин иптәштәрҙең, слесарҙар, вальцовщиктарҙан Н. Игитанов, М. Мансуров, Г. Зыкин, Н. Шарипов, Б. Шайхуллин, В. Павочкин, В. Ульянов, сварщиктарҙан Г. Лаппа, Б. Закиров, М. Омиров иптәш тәҙ стахановсылыҡ эш өлгөләрен күрһәтәләр.

Стахановсы-техник план — эске резервтәрҙе хәрәкәткә килтереүҙә мөһим сара. Беҙ планда билдәләнгән сараларҙы ныкышмалы рәүештә тормошка ашырыу, быйыл ҡуйылған тапшырылған ваҡыттан алда үтәү өсөн көрәшәбеҙ.

Р. Исхаков,
инженер, прокат цехы начальнигының урынбаҫары.

Продукцияның үҙкиммәтен төшөрөү хаҡын кәметеү өсөн

Белорет металлургия комбинаты үткән йылда тоҡ продукцияларын үҙкиммәтен төшөрөү ҡаҡшы планға карағанда 5030 мең һумға кәметте.

Шулай уҡ цехтар сырьё, ярымфабрикат һәм башка материалдарҙы күп тотоп, экономияны эшләүгә караганда ҙур артык расход яһады. Домна цехы тик домна газын уңышһыҙ файҙаланып, 127 мең һумлыҡ артык расход яһаны. Мартен цехы металлы шихта һәм ярымфабрикаттар буйынса планға карағанда артык расход яһаны. Прокат цехында ла материалдарҙы экономияны тотоп, йыл буйына ҡайҙа алынған материал расходтары ҙур суммаға барып етәләр.

Ленинград предприятиеләренең ялканлы сакырыуы Белорет металлургтарын биш йыллык планды дүрт йылда үтәү көрәшенә рухландырҙы. Илдең алдынғы заводтары шикелле рентабелле эшләү мәсьәләһе металлургия комбинатында тормошка ашыралған, тимер юлы өсөн якын арала хәл ителергә тейешле иң актуаль мәсьәлә булып тора.

Ошо мөһим бурыстарҙы тормошка ашырыу өсөн Белорет металлургия комбинаты 1948 йылға стахановсы техник-экономик план эшләне. Планға продукцияның үҙкиммәтен кәметеү, рентабеллеге эшкә күсеү мәсьәләһе индерелде. Бында айырым цехтарҙа быға тиклем файҙаланылмаған резервтарҙы тулыһынса хәрәкәткә килтереү күҙ тотолдо.

Комбинаттың эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр коллективе стахановсы техник-экономик план нигеҙендә үҙҙәренә төшкән һәр бурысты тормошка ашырыу өсөн көрәшә. Йөкләмәгә һәр бер цех, Тирлән заводы, Белорет тимер юлы буйынса күп төр материалдарҙы экономия яһау һәм расходтарҙы кыҫкартыу буйынса күп эш тора.

Мәҫәлән, домна цехы буйынса йылына 1600 тонна өҫтәмә металл, 5300 тонна кокс, 18000 кубометр ағас күмере, 400 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһау һәм расходтарҙы 1400 мең һумға кыҫкартыу билдәләнде. Мартен, прокат цехтары, Тирлән заводы һәм тимер юл буйынса ла ярыулыкка, металл экономия яһау, накладной расходтарҙы кәметеү буйынса конкрет бурыстар алынды.

Ярамсы цехтар буйынса продукцияның үҙкиммәтен төшөрөү хаҡын кәметеү 2400 мең һум тәшкил итәсәк.

Цех коллективтары алған йөкләмәләрен намыслы рәүештә үтәй барып, продукцияның үҙкиммәтен кәметеү юлы менән ундарса миллион һумға экономия яһасаҡтар һәм был экономия продукцияның кәметеүҙә ғына түгел, шулай уҡ комбинаттың тағы хеҙмәткә, ярышта алыу суммаһы күләмен байтаҡ кыҫкартыуға мөмкинлек бирәсәк.

Н. И. Балавин,
комбинаттың план бүлеге начальнигы.

Металлопромсоюздың штамплау заводы коллективе агрегат заводы коллективенең ярышка саҡырыуына яуап итеп биш айлыҡ планды 1 майға тамамларға йөкләмә алды. Заводтың стахановсылары көндәлек нормаһын артығы менән үтәй баралар.

Һүрәттә (һулдан уңға): Бәшкөр бригадаһы бригадиры иптәш О. Филиппова штамповщица М. Логиновага задание бирә. Бригада көндәлек нормаһын 250 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Технологияны артабан камилләштереү — мөһим бурыс

Белорет металлургия комбинаты Уралдағы иң күренекле заводтарҙың береһе. 1952 йылда уға 200 йыл туласаҡ. Бөйөк Октябрь революцияһына тиклем тимер катанкаһы һәм табаҡлы ҡалай ғына сығарған был металлургия заводы совет власеһенән данлыклы 30 йылы эсендә танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Ул, үҙенең юғары сифатлы продукция эшләүсе предприятие булыуы менән республикала ғына түгел, бөтә Советтар Союзы күләмендә айырыуса әһәмиәтле урын тотоп килә. Хәҙер комбинат күп төрлө маркала ҡорос эшләп сығара. Шуның күбеһе юғары сифатлы махсус легированный маркаларҙан тора. Советтар Союзының бик һирәк заводтарында эшләнә торған шарикоподшипниктар өсөн махсус ҡоростар етештереү үҙләштерелде.

Үткән йылға ҡарағанда быйыл юғары сифатлы продукция эшләп сығарыу 40 процентҡа арттырылырға тейеш. Был бурысты үтәү өсөн технологик процесте камилләштереү юнәлешендә байтаҡ сараларҙы тормошка ашырыу талап ителә. Беренсе нәүбәттә ағас күмере менән иретелгән суйындың сифатын тағы ла яҡшыртырға һәм был суйынды тик юғары сифатлы махсус маркалағы заказдар эшләүгә файҙаланырға кәрәк. Шулай уҡ заводтың башҡа төп цехтарында ла технологик процесте яҡшыртыу, производство культураһын ныҡ күтәреү талап ителә.

Ағас күмере менән иретелгән суйындың сифатына серьез кәмселек килтереүсе сәбәптәрҙән ҡотолоу быйыл хәл ителәсәк. Бының өсөн суйын иретеүҙә киң файҙаланылған стружкаларҙы (өҫтәлмә металл киҫәктәрен) аналиһыҙ ҡулланыуға юл ҡуйылмаясаҡ. Инструменталь һәм ҡаҡат ҡоростары өсөн иретелгән суйында башка төр металл ҡатышмалары булыуы бөтөнләй зарарлы. Шуға күрә беҙ зарарлы металл ҡатышмаларынан таҙа булған баҡыр һәм башка юнысҡылар булдырыуҙы бурыс итеп ҡуябыҙ.

Быйыл май айында эксплоатацияға тапшырыласаҡ яңы һауа өрҙөргөс беренсе номерле домна мейесенең етештереүсәнлеген ныҡлы күтәреүгә һәм был мейестә өҫтәлмә металл киҫәктәрен ҡулланыуҙан ҡотолорға мөмкинлек бирәсәк. Ул шулай уҡ икенсе номерле мейестә лә өҫтәлмә металл киҫәктәрен ҡулланыуҙы ныҡлы кәметәсәк. Был инде махсус маркалағы ҡорос иретеүҙе тағы ла киңәйтеүгә мөмкинлек бирәсәк.

Ҡорос иретеү технологияһын яҡшыртыу шулай уҡ мөһим бурыс булып тора. Беренсе нәүбәттә мартен цехында шихталар әҙерләүҙә киң урын алған тартынһыҙлыҡтарҙы бөтөрөү хәл ителергә тейеш. Сөнки быға тиклем мартен мейестәренә шихталар сортҡа айырылмайынса, нисек тура килде шулай бирелгәнләр. Ә шихталарҙа баҡыр һәм башка зарарлы ҡатышмалар күп. Спектраль анализдар яһау өсөн лаборатория булмауы шихталарҙы химик составына ҡарап группаларға бүлергә мөмкинлек бирмәй. Быларҙы хәл итеү өсөн махсус технологик инструкция эшләнде. Иретмәләр әҙерләгәндә шлак составын ҡаты контроль аҫтында тотоу, әҙер иретмәләрҙе яҡшы ҡулайлаштырылған канауҙарҙа ҡойоу, тик заказ буйынса бирелгән маркалы иретмәләр әҙерләү, цехта булған контроль һәм үлсәү механизмдарын тулы килеш файҙаланыу саралары билдәләнде. Был саралар аныҡ үтәлергә тейеш.

Прокат цехының яҡшы эшләүе мартен цехының ваҡытында, етерлек тиклем һәм юғары сифатлы металл биреүенә ныҡ бәйләнгән. Прокат цехы быға тиклем насар эшләмәне. Бынан һуң да уның етештереүсәнлеге эшләүе өсөн цехтың юғары ойошҡанлыҡ менән эшләүе, технологик дисциплинаны ҡаты һаҡлауы талап ителә.

Суйын, ҡорос иретеү, прокат эшләү технологияһын артабан яҡшыртҡанда, бөтә эске резервтарҙы хәрәкәткә килтергәндә металлургия комбинаты сталинсе биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәр, алдынғы заводтар кеүек рентабелле предприятиеға әйләнеүгә алғаш алыр.

В. И. Рыньков,
комбинаттың баш инженеры урынбаҫары.

Государство заемдарын конверсиялау айҡанлы облигацияларҙы алмаштырыу тураһында

«Аҡса реформаһы үткәреү һәм аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына карточкаларҙы бөтөрөү тураһында» СССР Министрҙар Советенең һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1947 йыл 14 декабрь ҡарарында государство заемдарына һәм һаҡлыҡ кассаларындағы махсус вкладтарҙы алыуға булған свидетельстволарға конверсия үткәреү ҡаралған.

Конверсия айҡанлы, бөтә государство заемдарының 1947 йылға тиклем сығарылған облигациялары һәм һаҡлыҡ кассаларындағы махсус вкладтарҙы алыуға булған свидетельстволар государствоның 2 процентле1948 йылғы заемы облигацияларына алмаштырылырға тейештәр. Был заем СССР Министрҙәр Советы ҡарары менән 20 йыл срокҡа — 1948 йылдың 1 ғинуарынан алып 1968 йылдың 1 ғинуарына тиклем срок менән 39 миллиард һум суммала сығарылды.

Государствоның 2 процентле 1948 йылғы заемы ике сығарылыштан — облигациялары халыҡҡа биреү өсөн билдәләнгән отошло сығарылыштан һәм облигациялары колхоздарға һәм кооператив ойошмаларға биреү өсөн билдәләнгән процентле сығарылыштан тора.

Облигациялар 1000, 200, 100, 50 һәм 25 һумлыҡ итеп сығарылалар.

Йыл һайын, 1948 йылдан башлап, заемдың отошло сығарылышы буйынса ике тираж үткәреләсәк. 500 миллион һум суммалағы отошло сығарылыштың һәр бер разрядына булған тираждарҙа түбәндәгеса отоштар уйнала:

Облигацияның үҙенең хаҡын да индереп, ике йөҙ һумлыҡ облигацияға отош күләме	ОТОШТАР КҮЛӘМЕ: 1—10 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	11—20 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	21—30 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	31—40 тираждарҙың һәр береһендә уйнала	Бөтә 40 тиражда уйнала
50.000 һум	2	2	2	2	80
25.000 һум	10	10	10	10	400
10.000 һум	25	25	25	25	1000
5.000 һум	50	50	50	50	2000
1.000 һум	500	500	500	500	20000
400 һум	12163	11963	11863	11663	476520
Отоштарҙың дөйөм күләме	12750	12550	12450	12250	500000
Отоштарҙың дөйөм суммаһы (мең һумдарҙа)	6215,2	6135,2	6095,2	6015,2	244608

Отмаған облигациялар 1953 йылдың 1 ғинуарынан башлап заем срогының аҙағына тиклем ҡалған 15 йыл эсендә үҙҙәренең хаҡтары буйынса түләнәләр (һатып алыналар).

Процентле сығарылыш облигациялары буйынса доход 1949 йылдың 1 ғинуарынан башлап һәр бер үткән йыл өсөн купондар буйынса түләнәләр.

Процентле сығарылыш облигациялары 1964 йылдың 1 ғинуарынан башлап йыл һайын тигеҙ өлөштәр менән үҙҙәренең хаҡтары буйынса 5 йыл буйынса һатып алыналар.

Облигацияларҙы алмаштырыу элекке заем облигацияларының 3 һумына государствоның 1948 йылғы 2 процентле заемы облигацияларының 1 һумы иҫәбенә үткәреләсәк. Һаҡлыҡ кассаларындағы махсус вкладтарҙы алыуға булған свидетельстволар ҙа шулай уҡ алыштырыла, йәғни государствоның 1948 йылғы 2 процентле заемы облигацияларының бер һумы талондарҙың үҙҙәрендә билдәләнгән 3-сө һәм 4-се номерле талондарҙың 3 һумына тигеҙләнә.

Һаҡлыҡ кассаларына һаҡлауға тапшырылған облигациялар был облигацияларҙың хужаһы үҙе килгәндә йәки уларҙың яҙма ғаризалары буйынса алыштырыла.

Конверсияланырға тейеш булған государство заемдары облигацияларын залогҡа һалып, ссудалар алыусы кешеләр алынған ссуда өсөн, проценттар түләмәйенсә, аҡсалата индерә алалар, һәм залогтан һатып алынған облигацияларҙы дөйөм тәртиптә государствоның 1948 йылғы 2 процентле заемына алмаштыра алалар.

Облигацияларҙы алмаштырыу түбәндәге сроктарҙа башланасаҡ.

Мәскәү һәм Ленинград ҡалаларында — 1948 йылдың 3 майынан башлап.

Горький, Куйбышев, Новосибирск, Молотов, Омск, Дондағы Ростов, Саратов, Свердловск, Сталинград, Челябе, Киев, Харьков, Баку, Тбилиси, Ташкент, Минск, Ашхабад, Сталинабад, Фрунзе, Алма-Ата, Ереван, Кишинев, Рига, Вильнюс, Таллин һәм Петрозаводск ҡалаларында, Горький, Куйбышев, Ленинград, Молотов, Мәскәү, Новосибирск, Омск, Ростов, Саратов, Свердловск, Сталинград, Челябе, Киев һәм Харьков өлкәләрендә — 1948 йылдың 15 майынан башлап.

Бөтә ҡалған республикаларҙа, крайҙарҙа һәм өлкәләрҙә — 1948 йылдың 25 майынан башлап үткәреләсәк.

Облигациялар алыштырыу 1948 йылдың 1 августына тиклем үткәреләсәк.

1948 йылдың 1 августына тиклем шулай уҡ конверсияланырға тейеш булған государство заемдарының облигациялары буйынса отоштар түләнәсәк һәм ошо заемдар буйынса сроктары 1947 йылдың 16 декабренә тиклем бәткән купондарҙы һәм һаҡлыҡ кассаларындағы махсус вкладтарҙы алыуға булған свидетельстволарҙан 1-се һәм 2-се номерле талондарға түләү үткәреләсәк.

Облигацияларҙы һәм свидетельстволарҙы алмаштырыу туранан-тура үҙәк һәм район һаҡлыҡ кассалары тарафынан, 1 разрядтағы һаҡлыҡ кассалары тарафынан, предприятиеләр, учреждениеләр һәм колхоздар тарафынан үткәреләсәк. Облигацияларҙы алмаштырыу тураһында календарь графигы һәр бер предприятиелә, учреждениелә һәм колхозда ҡала (район) финанс бүлектәре һәм үҙәк (район) һаҡлыҡ кассалары тарафынан билдәләнә, ул хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советы башҡарма комитеты тарафынан раҫланырға тейеш. (ТАСС).

Тимер юлдарында сәсеү йөктәрен тотҡарһыҙ үткәрергә

Өфө бүлексәһенең тимер юлсыларына яҙғы сәсеүгә билдәләнгән йөктәрҙе тотҡарһыҙ рәүештә оҙатыу буйынса яуаплы бурыстар йөкмәтелгән. Ләкин бында ул йөктәрҙең станциялар аша үҙ ваҡытында үткәрелеүе өҫтөнән бүлексә етәкселәре, шулай уҡ партия һәм комсомол ойошмалары тарафынан да көндәлек контроль алып барылмай.

Сәсеү йөктәре бигерәк тә Дим станцияһында тотолоп ятҡырылалар. Мәҫәлән, маневровый диспетчер Мыларевтың ғәйебе менән март айында Закавказьеға билдәләнелгән, орлоҡ тейәлгән вагондар бер нисә көн оҙатылмай тотолоп ятҡырылды. Бындай ваҡиғалар йыш ҡына булып торалар. Стәрлетамаҡҡа оҙатылырға тейешле көнбағыш орлоғо тейәлгән вагон менән дә шундай хәл булды. Вагонды тикшереү һәм уны билдәләнгән урынына оҙатыу өсөн 10 көн самаһы ваҡыт талап ителде. Сөнки станцияның етәкселәре Попов, Воловачев, вагон депоһы начальнигы Логинков иптәштәр йөкмәткеле йөктәрҙең үҙ ваҡытында оҙатылыуы өсөн хәстәрлек күрмәйҙәр.

Ошо уҡ станцияға ғинуар айында Уралға билдәләнгән, запас частәр тейәлгән вагон бер айҙан артыҡ тотолоп торҙо. Ә шулай ҙа ғәйепленәргә бер төрлө лә сара күрелмәне.

Черниковск тимер юл станцияһында ла (начальнигы иптәш Соломенко) комбайн моторҙарын һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр ебәреүҙе тотоп ятҡырыу фактылары бар. Мәҫәлән, Нахичеванға билдәләнгән дүрт вагон 8—9 көн буйына ебәрелмәй торҙо.

Өфө станцияһы работниктарының үҙ ваҡытында саралар күрмәүе арҡаһында сәсеү орлоҡтары, ауыл хужалығы машиналарына запас частәр транспорт-экспедиция конторһы склалтарында бик күп булып өйөлөп киттәләр.

Яҙғы сәсеүгә билдәләнгән йөктәрҙе станцияларҙа үҙ ваҡытында оҙатмай тотоп ятҡырыу — ул ҙур енәйәт булып тора. Быны Өфө тимер юл бүлексәһе һәм станция етәкселәренә белергә, йөктәрҙе йылдам үткәреү-оҙатыу сараһын күрергә бик ваҡыт инде.

М. Левитин.

Яҙғы сәсеүҙә республика культура-ағартыу учреждениеләренең бурыстары

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль пленумы һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү буйынса киңәйтелгән программаһын бирҙе. Ағымдағы йылда колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станциялары был тарихи ҡарарҙы үтәү өсөн яңы аҙым яһарға бурыслылар. Социалистик ауыл хужалығының артабанғы күтәрелеше һәм урожайлылыҡты арттырыу, ауыл хужалығы эшсәндәре араһында политик-массовый һәм культура-ағартыу эштәренең юғары идея-политик кимәлендә үткәрелеүенә бәйләнгән.

Культура-ағартыу учреждениеләре колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктәре араһында ауыл хужалығының фәнни нигеҙҙәрен индереү, алдынғыларҙың эш тәжрибаләрен популярлаштырыу буйынса байтаҡ көс һалды. Мәҫәлән, Бөрө районында 56 агротехник уҡыу түңәрәге эшләй, бында 630 колхозсы-звеноводтар, бригадирҙар, конюхтар һәм һыйыр һауыусылар йәлеп ителгән. Бары тик февраль һәм март айының беренсе яртыһында ғына ауыл хужалығы темаларына ҡарата 163 лекция һәм доклад уҡылды. Дәүләкән районы культура-ағартыу учреждениеләре лә яҙғы баҫыу эштәренә әлгәлә әҙерләнәләр.

Белорет районы уҡыу өйҙәре, библиотекалары баҫыу стандарында ойоштороласаҡ ҡыҙыл мөйөштәр өсөн 40 комплект шашка, шахмат һәм 25 партия домино әҙерләнәләр, 101 стена газетаһы һәм «боевой листоктар» сығарылды. Һигеҙ тапҡыр һорауҙар һәм яуаптар кисәһе үткәрелде, 15 уҡыу өйө ауыл хужалығы мөйөштәре ойошторҙо.

Шулай ҙа байтаҡ культура-ағартыу учреждениеләрендәге эштәрҙең кимәле халыҡтарҙың үҫә барған һорауҙарына яуап бирерлек итеп ҡуйылмаған. Мөһим политик һәм хужалыҡ бурыстарҙы хәл итеүҙән һәм хеҙмәтсәндәрҙең культураға үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙән ситтә торған культура йорттары, клубтарҙы, уҡыу өйҙәрен, район һәм ауыл библиотекаларын ла йыш ҡына осратып була. ВКП(б) Өлкә Комитетенең бюроһы Ауырғазы районының культура-ағартыу эштәренең торошо һәм бурыстары тураһында конкрет ҡарар ҡабул итһә лә, был ҡарарҙың сығыуына хәҙер ярты йыл уҙҙы, ләкин әле бында бер төрлө лә ыҡсыҡ һынылыш булғаны юҡ. Степановка ауыл Советенең уҡыу өйө ҡараңғы һәм һыуыҡ коридорҙа урынлашҡан, ә ике ҙур яҡты бүлмәлә уборщица үҙе тора. Ғафури районының «Буруновка» колхозы клубы әле булһа игендән бушатылмаған, етенсе номерле совхоздың клубын корзиналар үреү өсөн цех урынында файҙаланалар. Благовещен район библиотекаһының бинаһы квартира итеп файҙаланыла.

Юғарыла күрһәтелгән райондарҙа һәм шуның менән бер рәттән республиканың башҡа районларында ла культура-ағартыу учреждениеләренең эшенә район етәкселәре әле булһа етерлек баһа һәм әһәмиәт биреп еткермәйҙәр. Район Советтәренең культура-ағартыу бүлектәре мөдирҙәре үҙ системаһындағы түбәнге учреждениеләрҙең эштәре менән етәкселек итмәйҙәр, бөтә культура эшен үҙ ағышына тапшырғандар. Бындай райондарҙың етәкселәре был учреждениеләрҙе үҙ алдына йәшәүсе һәм күңел асыу урындары кеүек кенә итеп ҡарайҙар. Уларҙың өҫтөнән етәкселек һәм контроллек итмәйҙәр.

Культура-ағартыу учреждениеләренең яҙғы сәсеүгә әҙерлектәге һәм уны уҙғарыуҙа төп һәм нигеҙ бурыстары булып — алдынғыларҙың эш методтарын пропагандалау буйынса конкрет эшкә башлауҙан тора. Баҫыу эштәре башланғанға тиклем колхоздарҙа, совхоз һәм МТС-тарҙа ауыл интеллигенцияһы менән берлектә бригадирҙарҙың, звеноводтарҙың семинарҙарын үткәрергә, яҙғы сәсеү осоронда колхозсыларҙы баҫыу стандарында, трактор бригадаларында туранан-тура культуралы хеҙмәтләндереү буйынса конкрет саралар билдәләргә кәрәк.

Район Советтәренең культура-ағартыу эштәре бүлектәре, яҙғы сәсеүҙә массовый эш алып барыу буйынса пландар төҙөп, уны район Советтәренең ултырышында раҫларға бурыслылар. Сәсеүгә төшөү алдынан бөтә клубтар, уҡыу өйҙәре, библиотекалар күргәҙмә агитацияны бөтөнләйгә яңыртырға тейештәр, плакаттар, лозунгылар яҙыу, күргәҙмәләр, газета витриналары, ауыл хужалығы алдынғыларының почет таҡталары һәм ярыш таҡталарын булдырырға бурыслылар. Ошоноң менән бер рәттән ҡыҙыл мөйөштәр культвагончиктәрҙе йыһазландырыу һәм художестволы биҙәү эштәре буйынса ла әҙерлек эштәрен алып барырға тейештәр. Уларҙы газета һәм журналдар, күсмә библиотекалар, шашка, шахмат, доминолар менән тулыһынса тәьмин итергә кәрәк. Ялан ҡыҙыл мөйөштәрендә культвагончиктәрҙә ҡыҫҡырып газета һәм журналдар уҡыуҙы ойоштороу, массовый-политик эште киң йәйелдереп ебәреү сәсеү планының үтәлешенә ярҙам итасаҡ.

Район культура-ағартыу бүлектәре иң яҡын кәндәрҙә, район мәғариф, ауыл хужалығы, һаулыҡ һаҡлау бүлектәре менән берлектә агрозоотехник, ғилми һәм санитария-ағартыу белемдәрен пропагандалау, консультацион-справка эштәрен киң йәйелдереп ебәрергә бурыслылар.

Культура-ағартыу работниктәре, республикабыҙҙың бөтә колхоз крәҫтиәндәре менән берлектә, яҙғы сәсеү эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн, үҙҙәренең бөтә көстәрен һәм белемдәрен һалып эшләргә тейештәр.

Р. Ҡолмөхәмәтов,
Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу эштәре учреждениеләре управлениеһының өлкән инспекторы.

Башҡортостан ботаника баҡсаһында ҡарында үҫә торған кокос пальмаһы, хамеропс пальмаһы, драценаҙар, кипарислар һәм башҡа төрлө үҫемлектәр осратырға мөмкин.

Һүрәттә: Ботаника баҡсаһының эшсеһе П. К. Даутова ниташ үҫемлектәр араһында. **В. Жданов фотоһы.**

Шахмат

Донъя беренселегенә матч-турнир

Донъя беренселеге өсөн шахмат матч-турниренең Мәскәүҙә уйналасаҡ икенсе яртыһы 11 мартта башланды. Колонный зал халыҡ менән тулған. Тап 17 сәғәт 30 минутта матч-турнирҙың баш судьяһы Югославия гроссмейстере Милан Видмар 11 турҙа осраныусы Эйве—Керес һәм Смыслов—Решевскийҙарҙың сәғәтен йөрөтөп ебәрә.

Беренсе йөрөштәр ике таҡтала ла бер төрлөләр: Испан партияһы уйнала. Эйвенең Керес менән көрәше тәүге йөрөштән үк көсөргәнешле тең алды. Ҡаралар менән уйнаусы СССР чемпионы Керес, үҙ король флангыһындағы пешканы ике аҙым йөрөп, бишенсе йөрөштә үк ҡыҫҡен уйын башланы. Тиҙ үк был партияла ҡараларҙың пешка ҡорбан итә торған вариантың уйналыуы асыҡлана. Совет теоретиктәренә һәм шахматистәренә был вариант бик билдәле һәм элекке ярыштарҙа йыш ҡулланылды, мәҫәлән, Ленинград беренселеге турнирендә Бурман—Толуш партияһы. Эйве тәҡдим ителгән пешканы алды. Уның ҡарауы, Керестә позицион өҫтөнлөк тыуҙы.

Эйве 15-се йөрөштә юл ҡуйылмаҫлыҡ хата яһай: ферзь флангыһындағы фигураларҙың хәрәкәтен үҫтереү урынына, үҙенең аҡ юлдан йөрөүсе слонын ҡараларҙың пассив атына алмаша. Ошонан һуң Керестең бөтә фигуралары бик тиҙ уйынға ҡатнашып китәләр, уның король флангыһындағы һөжүме ҡырҡа тең ала. Керес 19-сы йөрөштә ике пешкаға атын ҡорбан итеп, аҡтарҙың позицияһын тамам ҡыйрата.

Ошонан һуң, аҡтар 25-се йөрөш яһағас, ҙур материаль юғалтыуҙарҙы күреп, Эйве бирелергә мәжбүр була. Совет чемпионының еңеүен ҡарап тороусылар көслө алҡыш менән ҡаршылайылар.

Смысловтың Решевский менән испан партияһы тынысыраҡ дауам итте. Унда 12-се йөрөшкә тиклем, ошо матч-турнирҙа Эйве менән Керес араһында беренсе турҙа булған, ҡараларҙы ҡыҫынҡылыҡта ҡалдырған хәл ҡабатланды. Уйын башынан Решевский ҙә үҙенә бер төрлө файҙа сығара алманы. Аҡ ат таҡта уртаһында бик көслө позиция алды һәм аҡтарҙың өҫтөнлөгө асыҡланды. Король флангыһында аҡтарҙың хәтәр һөжүмен алдан кире ҡағыу өсөн Решевскийгә үҙәк һыҙыҡтарҙың береһен биреп торорға тура килде. Шул уҡ ваҡыт аҡтарҙың ике слоны ла бик активләштеләр. Смыслов тыныс һәм нык уйланған йөрөштәр менән үҙенең өҫтөнлөгөн арттыра барҙы. Тиҙ арала таҡта уртаһында ҡараларҙың кесеҙ пешкаһы барлыҡҡа килә. Решевскийҙең пешканы һаҡларға сәп тырышыуҙары бер ниндәй һөҙөмтәгә лә килтермәнеләр.

Ҙур ябайлаштырыуҙарҙан һуң партия ладьялар менән уйнап бөтәрәлә торған хәлгә килде. Смысловтың ладьяһы һәм дүрт пешкаһына ҡаршы Решевскийҙең ладьяһы менән өс пешкаһы бар. Партия 41-се йөрөштән һуң, Решевский өсөн ауыр хәлдә кисектерелле. Ул үҙенең һуңғы йөрөшөн яҙып ҡуйҙы.

Смыслов — Решевский партияһын уйнап бөтөү 12 апрелдә Союздар йортоноң Октябрь залында дауам итте. Уйын биш минуттан артыҡ барманы. Тағы 15 йөрөш яһағас, 52-се йөрөштә, Решевский үҙен еңелгән, тип иҫәпләне.

Шулай итеп, 11 турҙан һуң Ботвинник элеккесә беренсе урынды тота; уның 8 мөмкинлектән — 6 очкоһы бар. Туғыҙ уйындан Керес менән Смысловтың — 5-әр, Решевский 4,5, Эйве 1,5 очко алдылар.

Колумбиялағы ваҡиғалар

НЬЮ-ЙОРК, 11 апрель. (ТАСС). Колумбиялағы либералдар һәм консерваторҙар араһында [illegible] бәрелешеүҙәрҙән һуң колумбия либерал партияһы лидеры Гайтан үлтерелде. Был бәрелешеүҙәр һуңғы бер нисә ай буйынса дауам иттеләр. Һөҙөмтәлә ике партиянан да 300-гә яҡын кеше үлтерелде. Либералдар консерваторҙарҙы террористик тактика ҡулланыуҙа ғәйепләйҙәр. Был тактика диктатура урынлаштырыу маҡсатын тота. [illegible] Оспина Перес [illegible] 1950 йылдағы [illegible]

[illegible]

Гайтан һәм башҡа либерал лидерҙар консерватив партия лидеры Лауреано Гоместе [illegible]

Шулай һуң Колумбия либерал партияһының [illegible] Оспина Перескә [illegible] 1950 йыл [illegible]

[illegible]

1946 йылда һайлау алды кампанияһы барышында либерал партия тарҡалды. [illegible]

Хәҙерге ваҡытта сенатта 34 урын либералдарҙыҡы (29 урын консерваторҙарҙыҡы) һәм депутаттар палатаһында либералдар 70 урын (консерваторҙар 53 урын) биләйҙәр. [illegible]

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель. (ТАСС). Юнайтед Пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһенә [illegible]

ВАШИНГТОН, 11 апрель. (ТАСС). Америка хәбәрсеһе Боготанан, 9 апрелдә [illegible]

[illegible]

Иминселек советендә

НЬЮ-ЙОРК, 11 апрель. (ТАСС). [illegible]

[illegible]

Колхоз ауылынан хаттар

3. Яҙғы йыр

... Йыр, дуҫтай, саҡыра беҙҙе алға!

Закирәнең үҙенә, бер үҙенә генә әйтеп сығырылғайнымы икән был йыр, әллә Рәкиәнең көлтә бәйләүҙә беренселекте алыуы ла ошо көйҙә маҡталдымы икән... Хәйер, юғары урожай звеноһы участкаһынан ашлыҡ һуғып алынғас, ауыл йәштәре унда эшләгән бөтә ҡыҙҙарҙы ла түңәрәк уртаһында ҡалдырып, бөтәһе өсөн дә шул уҡ йырҙы йырланылар бит.

Таң ҡоштары һайрағанда
Иң алдан уяна ул,
Йәрәктәргә ут һала ул,
Бик уңған ҡыҙ бала ул.

Бына әле лә, Фәрих Ҡилдеяров ҡулына дүрт планкалы гармонын алып, шаяртып йылмайҙы иһә, көндөҙ баҫыуҙа ҡар һыуы тотоп ҡайтҡандан һуң булһын, кисен клубта йыйылғанда булһын, егеттәр бер тауыштан «Йәрәктәргә ут һала ул...» тип йырҙы күтәреп алалар. Яҙғы ҡояшты ҡаршыларға асылған тәҙрәләрҙән өйҙәргә үтеп инә был йыр, күңелле йәшлектең дуҫы, юлдашы булып, инде ҡар һыуы шишмәләрен уйнатып Дим боҙҙарын ҡуҙғатыусы киң баҫыуҙарға саҡыра...

Алтын йәйҙә алыҫ киңлектәр киске шәфәҡ алһыулығын балҡытып иртәл ҡалҡасаҡ ҡояшты офоҡ артына оҙатҡанда, көн буйына баҫыуҙа бил бөгөп, тип түгеп эшләгән колхозсылар ауылға ялға ҡайтҡанда күкрәктәргә иркенлек, арыған аяҡтарға еңеллек биреп яңғыраясаҡ йырҙарҙы өйрәнәләр бөгөн йәштәр. Уларҙы үҙҙәренең яҙғы репертуарҙарына индерәләр. Рәсми рәүештә, яҙғы сәсеү осоронда культура-ағартыу саралары үткәреүгә әҙерлектең торошо, тип әйтелә торған һүҙҙе тап бына шунан — хәҙер үк инде баҫыу стандары өсөн концерттар, спектаклдәр биреү хәстәрлеген күреүсе драмахор түңәрәгенең эшмәкәрлегенән башларға кәрәк. Һәр эште башлап, кәрәк саҡта үҙе йырлап, үҙе бейеп йөрөүсе комсомолка Ғәйшә Галина етәкселек иткән был түңәрәк бәләкәй генә ауылдың «ҙур театры, йыр һәм бейеү ансамбле» булып иҫәпләнә. Дәртле йәштәрҙән уның эшендә ҡатнашмаған кешене таба алмайһың бында. Йырсылар ҙа, бейеүселәр, музыканттар ҙа ошо күңелле коллективта үҙҙәренең һәләтлектәрен үҫтереп, ауылдаштарының һөйөклөләре булып киттеләр.

Артель кешеләре яңы йырҙың, иң яҡшы хистәрҙе уятыусы музыканың ҡәҙерен беләләр, үҙэшмәкәрлек оҫталарына хөрмәт күрһәтәләр. Киске концерт йәки спектакль тураһында дәфтәр ҡағыҙына йыйнаҡ ҡына итеп яҙылған белдереү клуб ҡапҡаһына эленде иһә, бөтә урамдарҙа ла көндеҙҙән үк йәнле хәрәкәт башлана. Өйҙәрҙә байрам кейемдәре һалынған һандыҡтарҙың йоҙаҡтары асыла. — Клубҡа биҙәнмәй-кейенмәй генә барырға ярамы һуң! Унда керосин лампалары менән яҡтыртылған сәхнәлә, Зариф Ишдәүләтов менән Ниғмәтбай Ибраһимов икәү бергә скрипка уйнатырҙар. Ғәззә Дәүләтбаева, Закирә Байтурина, Таслимә Нәжфарова башҡорт һәм рус көйҙәрен башҡарырҙар, гармон көйөнә бейеп, ритмлы етеҙ хәрәкәттәре менән күҙҙәрҙе иркәләрҙәр. Моғайын, элекке концерттәге номерҙәрҙе ҡабатламаҫтар әле улар, быйғаса ауылда ишетелмәгән берәр яңы йыр йырлап, башҡорт шағирҙәренең киҫәге газетала ғына баҫылып килгән шиғырын һөйләп күңелде күтәрмәй ҡалмаҫтар...

Ауылдаштарының һәр ваҡыт шулай яңылыҡҡа ынтылыуҙарын үҙэшмәкәр түңәрәктә ҡатнашыусы йәштәр яҙғы сәсеү башланғас клубта һәм баҫыу стандарында күрһәтәсәк концерт номерҙәрен әҙерләгәндә лә иҫтә тоталар. Уларҙың репертуарында, — «Урожай йыры» ла, башҡорт совет композиторҙарының әле радио аша ғына тапшырыла торған яңы көйҙәре лә, Сталин премияһы лауреаттары Алексей Недогонов, Николай Грибачев һәм башҡа шағирҙарҙың иң яҡшы поэмаларынан газета, журналдарға баҫылған өҙөктәр ҙә, — ауыл һәм район сәхнәһе өсөн файҙаланырлыҡ бик күп яңы әҫәрҙәр бар.

Яҙғы-йәйге эштәр осоронда колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереүҙе комсомолецтар правление алдында ҙур мәсьәлә итеп күтәреп сыҡтылар. Нинә баҫыу стандарында радио приемниктәр булдырмаҫҡа һәм тағы ла берәр гармонь, икеее мондалина алдырып ебәрмәҫкә? Библиотекаға яңы китаптар ебәреүен райпотребсоюз етәкселәренән генә көтөп тороуҙа ни мәғәнә бар! Правление члендәре лә, бөтә колхозсылар ҙа комсомолецтарҙың һүҙҙәрен яҡланылар һәм кәрәкле культура инвентарҙәре алып ҡайтыу өсөн, завхоз менән бергә комсоорг Ибраһимовтың үҙен лә ебәрмәксе булдылар.

Музыка ҡоралдары ла һәм яңы художестволы әҙәбиәт китаптары ла, быйыл ғына алынған яңы һабандар һәм сәскес машиналары кеүек үк, кәрәк колхоз хужалығына. Культуралы хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртыу өсөн бик күп нәмәләр кәрәк һәм уларҙың бөтәһен дә бер юлы ғына, бер ай эсендә генә табып, ҡайтарып та булмай. «Алма бешеп ауыҙға төшкәнен» көтөп ятҡансы, үҙендәге мөмкинлектәрҙе тағы ла иҫәпләп ҡарау, халыҡтың иғтибарына лайыҡлы булырлыҡ инициатива күрһәтеү яҡшыраҡ түгелме? Парторг Мөхәмәтғәлин комсомолецтар һәм йәштәр менән бына ошо турала һөйләшеп, кәңәшләшеп, бик яҡшы эшләне. Һәр бер хыяллы эшкә ашырыу өсөн тауҙарҙы ла аҡтарырға әҙер тороусы егеттәр һәм ҡыҙҙар үҙҙәренең нәмәләр эшләргә теләгәнлектәрен шатланып әйтеп бирҙеләр. Ғәйшә Галина ҡурайсы ҡарттарҙың сығыштарын ойошторорға һәм уларҙан йәштәрҙе өйрәтеүҙе һорарға кәрәклеге тураһында тәҡдим индерҙе. Семья мәжлестәрендә генә ҡурай тартҡан ҡарттар клубҡа килеп үҙҙәренең оҫталыҡтарын күрһәтеүгә, егеттәрҙе лә бик әйбәтләп был һөнәргә өйрәтеүгә ниәтләп ҡаршы килһендәр, ти! Унан һуң, һәр звено өсөн күсмә библиотека ойоштороу фекере әйтелле. Агротехника буйынса байтаҡ ҡына китаптар алынды быйыл. Сельпо магазиненә лә яңы китаптар килеүе көтөлә. Шуның өҫтәүенә, колхозсыларҙың үҙҙәренең өйҙәрендә уҡып сыҡҡас та кәштәгә ташланған, файҙаланылмай тотолған романдар, повестар ҙа байтаҡ ҡына табылыр. Күсмә библиотекаларҙы тулыландырыу өсөн был бик әйбәт өҫтәмә бит. Инде күргәҙмә агитация мәсьәләһенә килгәндә, витриналар бар, стена газетаһының һәм «боевой листоктарҙың» редакторҙары билдәләнгән. Тағы ла нәмә эшләргә мөмкин булыр ине икән?

— Беҙҙең Рәүеф Абдрахманов звеноһы үҙ участкаһынан юғары урожай алды бит! — тинеләр йәштәр. — Уларҙы күреп танышыр өсөн сәсеү ваҡытында ла күрше ауылдарҙан килеүселәр булмай булмаҫ. Алдынғыларға хөрмәт күрһәтеп, звено члендәренең үҙҙәре һәм уларҙың эштәре тураһында фото-витрина яһатып алғанда ҡалай шәп булыр ине.

Был турала нисек алданыраҡ уйламағандар улар! Йәштәрҙең ауыҙынан шул һүҙ сығыуы булды, икенсе көндә үк колхоз председателе иң яҡшы атты ектереп район үҙәгенән фотографты саҡыртырға кеше лә ебәрҙе.

Абдрахманов звеноһының члендәре тәүҙә бөтәһе бер группала, унан һуң айырым-айырым төшөрөлдөләр фото-рәсемгә. Тартынып, уңайһыҙланып торорға ирк бирмәнеләр уларға. «Районда беренселекте алдыҡ тигәс тә, танау сөймәгеҙ әле, — тип, шаяртып әйтеүселәр ҙә булды. — Беҙ ҙә быйыл яңы звенолар төҙөп эшкә тотонорға торабыҙ ҙа [illegible] алдынан бергә төшкән рәсем һүҙҙәребеҙҙе беркетерлек иҫтәлек булыр». Данлы звено члендәре уртаға алып, үҙҙәренең был мауыҡтарҙағы шатлыҡтарын, тулҡынланыуҙарын оҙаҡ йылларға рәсемдә ҡалдырырға теләп, бөтәһе лә бер төркөмдә фотоаппарат алдына теҙелделәр.

Рәсемдәрҙе ҡыҙыл буяулы рамкаға теҙеп, матурлап клуб түрендәге ике тәҙрә араһына ҡуйҙылар. Иртәнге ҡояш күтәрелгәндә лә, киске уттар тоҡандырылғанда ла яҡтылыҡ иң тәүҙә ошо рәсемдәрҙе балҡыта. Улар араһында Закирә Байтурина менән Рәкиә Муллағалинаның йөҙҙәре, күҙҙәре айырым асыҡ булып күҙгә ташлана тора. Яҙғы ташҡын башланғанға тиклем ял ваҡыттарының күп өлөшөн әле һаман да клубта үткәрергә күнеккән йәштәр кистәрен йыйылышып, түңәрәктә әйләнеп уйнағанда Закирә менән Рәкиәнең рәсемдәренә ҡарап, йә дуҫ ҡыҙҙарҙы уртаға алып, уларға арнап сығарылған йырҙы ярһыулы дәрт күтәренке күңел менән йырлайҙар.

...Йәрәктәргә ут һала ул,
Бик уңған ҡыҙ бала ул.

Йыр, — урожай өсөн көрәшкә сығырға әҙерләнеүсе колхоз ауылының йөрәк тауышы булып яңғырай бөгөн...

Ғ. Әхмәтшин.
(Махсус хәбәрсебеҙ)
Дәүләкән районы,
«Ҡыҙыл Урал» колхозы

Яуаплы редактор урынбаҫары
З. Ю. ВАХИТОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00120. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 76

16 апрель йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘА:

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса 1948 йылдың I кварталында государство планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының белдереүе (1-се бит).
Г. А. Деборин. — Икенсе бөтә донъя һуғышы иисек әҙерләнгән. (2-се бит).
Италия менән ярашыу договорын ҡайтанан ҡарау тураһында Англия, АҠШ һәм Франция хөкүмәттәренең тәҡдименә ҡарата. (2-се бит).
ТАСС-тың белдереүе. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Сайфуллин. — Конференция ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу юлында.
Н. Даутов. — Колхоз коммунистәре. Н. Еисмәтуллин. Политик белемдәрен күтәрәләр. (3-сө бит).
В. Долженых. — Предприятиеләрҙә май алды ярышы киң йәйелдереү өсөн. (3-сө бит).
Назар Нәжми. — Социалистик Хеҙмәт Геройы Өлкән агроном Борис Титов. (3-сө бит).
ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Ғ. Зөлкәрнәев. — Тулы тауышҡа йырланмаған йырҙар. (4-се бит).
КИНО. Н. Буляков. — «Себер ере тураһында хикәйәт». (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Республикабыҙ ҡалаларының санитария торошон яҡшыртырға

Һуғыштан һуңғы сталинсе яңы биш-йыллыҡ план халыҡтың һаулығын һаҡлауҙы күтәреү буйынса ҙур бурыстар ҡуйҙы. Был бурыстар һаулыҡ һаҡлау учреждениеләренең, предприятие һәм учреждениеләр етәкселәренең, хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау ауырлығын тағы ла нығыраҡ арттыра. Халыҡтың көн-күреш шарттарын яҡшыртыу, уның һаулығын һаҡлау саралары көсәйтеү бөгөнге көндә ҙур бурыстарҙың береһе булып тора һәм был бик мөһим бурысты тулыһынса үтәү өсөн беҙҙең илебеҙҙә бөтә мөмкинлектәр булдырылған.

Совет Хөкүмәте һәм большевиктар партияһы һаулыҡ һаҡлау эштәренә юғары кимәлдә ойоштороу турында ҙур ҡарарҙар ҡабул итте. Һәр бер кешенең сәләмәтлеге турында бик тиклем хәстәрлек күреү бер нисдәй капиталистик илдә лә булғаны юҡ һәм була ла алмай. Социализм илендә һаулыҡ һаҡлау эшенә бик күп расходтар яһала, бик ҙур профилактика һәм дауалау саралары үткәрелә. Профилактика һәм дауалау учреждениеләренең төрөһө киңәйтелә, медицина кадрҙары составы йылдан-йыл тулылана бара, медицина фәне үҫә һәм байый. Улар бөтәһе лә совет халҡына хеҙмәт итәләр һәм ҙур ҡаҙанышлар әҙерләп бүлдылар.

Ләкин һаулыҡ һаҡлауҙы ойоштороу тик медицина работниктарының ғына эше түгел. Ул бөтә халыҡ, бөтә общественность бурысы булып тора. Һәм бигерәк тә яҙғы ваҡытта был эшкә бөтә халыҡ күтәрелергә тейеш.

Яҙ көнө ҡар иреү менән, ер өҫтөнә бөтә былсыраҡтар ҡалҡып сыға, көндәр йылыныу менән был былсыраҡтар төрлө йоғошло ауырыуҙар (ашҡазан-эсәк һәм башҡа ауырыуҙар) таратыусы усағы булып әүерелә. Әгәр ҡалаларҙа урамдарҙы, баҙар майҙандарын, баҡсаларҙы һәм башҡа урындарҙағы былсыраҡтарҙы таҙартмайынса ҡалдырһаң, улар йоғошло ауырыуҙар таратыусы булалар. Ә инде ауырыуҙар таралғас уның менән көрәшеү ҡатмарлы. Шуның өсөн ауырыуҙарҙы булдырмау сараһын алдан күрергә кәрәк. Бигерәк тә ҡалаларҙы былсыраҡтан таҙартыу, ҡалалар һәм урамдарҙы, предприятие, учреждениеләр, бөтә общественные урындарҙағы санитария шарттарын тулыһынса үтәүгә һәм улар өсөн бөтә санитария сараларын күтәреүҙе тиҙләтеү мотлаҡ талап ителә.

Ҡалаларҙа халыҡ һаулығын һаҡлауҙа ҡаланы төрлө былсыраҡтан үҙ ваҡытында таҙартыу бик ҙур роль уйнай. Һуңғы көндәрҙә ҡала халҡы был гәйәт мөһим эшкә актив рәүештә тотонды. 11 апрелдә Өфөлә үткәрелгән воскресник бойтаҡ яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Был көндө Өфө ҡалаһы өй алдарын, урамдарҙы таҙартты.

Ләкин ҡаланы былсыраҡтан таҙартыу эшенән бик күп предприятие, совет һәм хужалыҡ учреждениеләре етәкселәре һаман әле ситтә торалар. Улар был эшкә ҡарата кәрәкле транспортты һәм эшсе көсөн бирергә теләмәйҙәр. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы башҡарма комитетының 10 апрелдәге ҡарары буйынса ҡаланы таҙартыу эшенә бөтә халыҡ күтәрелергә, булған транспорт һәм мөмкинлектәр тулыһынса файҙаланылырға тейеш. Был ҡарар буйынса бөтә предприятие һәм учреждение етәкселәре үҙ территорияларын таҙартыуҙы ойоштороуға тейеш ителәр. Ләкин, шуға ҡарамаҫтан, Башсоюз, кирбес заводы, 8-се март исемендәге тегеү фабрикаһы етәкселәре һаман да әле борсола алмайҙар, ә Өфө баҙар комитеты баҙарҙарҙың санитария торошона, гөмүмән, тейешле иғтибар бирергә уйламай.

Санитария торошон күтәреү мәсьәләһе шулай уҡ Черниковск һәм башҡа ҡалаларҙа ла тейешле иғтибарға әлегә тиклем эйә булып етә алғаны юҡ. Черниковск ҡалаһындағы машиналар төҙөү заводы территорияһы һаман да тейешле санитария һәм культуралы хәлгә килтерелмәгән әле.

Яҙ көнөндә йоғошло ауырыуҙарға юл ҡуймаҫ өсөн ҡалаларҙы былсыраҡтан таҙартыуға бөтә общественносте, бөтә халыҡты күтәрергә, бөтә транспортты тулыһынса файҙаланырға кәрәк. Өй алдарыбыҙҙы, предприятие территорияларын, урамдарҙы, баҡсаларҙы һәм баҙар майҙандарын таҙартайыҡ, уларға матур, культуралы төҫ бирәйек. Быны ҡаланың һәр бер хеҙмәтсәне үҙенең көндәлек һәм мөһим эше тип иҫәпләргә тейеш!

Ҡалаларҙа тейешле санитария һәм культура саралары үткәреүҙә, әлбиттә, район һаулыҡ һаҡлау бүлектәренең, медицина работниктарының, агитаторҙарҙың роле бик ҙур. Улар былсыраҡлыҡтың зарарҙары тураһында, төрлө йоғошло ауырыуҙарҙың ҡайҙан килеп сығыу мөмкинлектәре тураһында халыҡ араһында беседалар үткәрергә, докладтар һәм лекциялар менән радиола һәм матбуғатта сығыштар яһарға тейештәр. Был эштәргә шулай уҡ бөтә общественный активистарҙы ылыҡтырылырға һәм актив рәүештә ҡатнашырға бурыслылар.

Бөтә халыҡ байрамы — Беренсе Май яҡынлашып килә.

Яҙ байрамы — Беренсе Майға әҙерлек айҡанлы тыуған ҡалаларыбыҙға тейешле санитария һәм культуралы төҫ бирәйек!

Ҙур рәхмәт

ПЕТРОВСК. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). СССР Верховный Советы Президиумының Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһындағы Указы Маҡар районы «Өлкәр» колхозында ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланды.

Бөтә колхозсылар клубҡа йыйылдылар, Ленин ордене менән наградланған звеноводтарҙан Ишмөхәмәтова, Исачкина, Ивушкина һәм «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене менән наградланған колхоз председателе Ляльков иптәштәрҙе ҡайнар рәүештә тәбрикләнеләр.

— Үткән йылдағы уңышыбыҙ өсөн күп кенә колхозсылар ҙур награда алдылар. Беҙҙең хеҙмәт юғары баһаланды. Быйыл беҙ тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, юғарыраҡ урожай алырға бурыслыбыҙ, — тине колхоз председателе иптәш Ляльков.

Шунда уҡ звеноводтарҙан Ивушкина һәм Исачкина иптәштәр һүҙ алдылар һәм игенселәрҙең хеҙмәттәрен юғары баһалаған өсөн партиябыҙға, хөкүмәтебеҙгә ысын күңелдән рәхмәттәр әйттеләр.

— Беҙҙең звено, — тине иптәш Исачкина,—быйыл һәр гектарҙан 200-әр бот урожай алыу өсөн көрәшә. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн күп кенә саралар күрелде. Тиҙҙән баҫыуҙарға сығып, уңымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырасаҡбыҙ, сәсеүҙе яҡшы сифатлы итеп, ҡыҫҡа срокта үткәрәсәкбеҙ.

Ҡар һыуҙарын тоталар

РАЕВКА. (Телефон аша). Әлшәй районының күп кенә колхоздары баҫыуҙарҙа ҡар һыуҙары тотоуға башланылар.

«Ленинская победа» колхозында был эште көн һайын 20 колхозсы һәм 9 ат эшләй. Бер-нисә көн эсендә генә колхозсылар 70 гектар майҙанда ҡар һыуҙарын тотоуҙы ойоштороуҙылар.

«Көрәш» ауыл хужалығы артеле колхозсылары 30 гектар, Тельман исемендәге колхоз членары 50 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тоталар. «Марс», «Суалҙа» (Слаҡ ауыл Советы) һәм Молотов исемендәге колхоздарҙың звенолары ла был эште киң йәйелдерәләр.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса 1948 йылдың I кварталында государство планының үтәлеш йомғаҡтары тураһында

СССР Госпланының белдереүе

1948 йылдың I кварталында промышленность, ауыл хужалығы һәм транспорт эше, капиталь эштәр һәм ваҡлап һатыу буйынса тауар әйләнеше күләме түбәндәге мәғлүмәттәр менән характерлана.

I. ПРОМЫШЛЕННОСТӘ ПРОИЗВОДСТВО ПЛАНЫНЫҢ ҮТӘЛЕШЕ

1948 йылдың I кварталында промышленностең валовой продукция буйынса производство планы министерстволар тарафынан түбәндәгесә үтәлде:

	1948 йылдың I кварталында квартал планының үтәлеш проценте
Ҡара металлургия Министерствоһы	107
Төҫлө металлургия Министерствоһы	102
Көнбайыш районлыҙарҙың күмер промышленносе Министерствоһы	105
Көнсығыш районлыҙарҙың күмер промышленносе Министерствоһы	101
Көньяҡ һәм көнбайыш районларҙың нефть промышленносе Министерствоһы	104
Көнсығыш районларҙың нефть промышленносе Министерствоһы	106
Электр станциялары Министерствоһы	104
Химия промышленносе Министерствоһы	109
Электр промышленносе Министерствоһы	108
Связь средстволары промышленносе Министерствоһы	106
Ауыр машиналар төҙөлешө Министерствоһы	100
Автомобиль һәм трактор промышленносе Министерствоһы	109
Станоктар төҙөлешө Министерствоһы	101
Машиналар төҙөлешө һәм приборҙар төҙөлешө Министерствоһы	107
Төҙөлеш һәм юл машиналары төҙөлешө Министерствоһы	113
Транспорт машиналары төҙөлешө Министерствоһы	105
Ауыл хужалығы машиналары төҙөлешө Министерствоһы	103
СССР төҙөлөш материалдары промышленносе Министерствоһы	109
СССР урман промышленносе Министерствоһы	94
Целлюлоза һәм ҡағыҙ промышленносе Министерствоһы	112
Резина промышленносе Министерствоһы	111
СССР текстиль промышленносе Министерствоһы	104
СССР еңел промышленность Министерствоһы	101
СССР-ҙың көнбайыш районларының балыҡ промышленносе Министерствоһы	102
СССР-ҙың көнсығыш районларының балыҡ промышленносе Министерствоһы	123
СССР ит һәм һөт промышленносе Министерствоһы	93
СССР аҙыҡ-түлек промышленносе Министерствоһы	108
СССР тәмле әйберҙәр эшләп сығарыу промышленносе Министерствоһы	97
Союзный республикаларҙың урындағы һәм урындағы яғыулыҡ промышленносе Министерстволары	99

СССР-ҙың бөтә промышленносенең валовой продукция буйынса 1948 йыл I квартал планы 102 процентҡа үтәлде.

Ҡайһы бер министерстволар — төҫлө металлургия Министерствоһы, ауыр машиналар төҙөлешө Министерствоһы, транспорт машиналары төҙөлешө Министерствоһы, ауыл хужалығы машиналары төҙөлешө Министерствоһы һәм еңел промышленность Министерствоһы, валовой продукция буйынса планды тотош алғанда үтәһәләр ҙә, шул уҡ ваҡытта продукцияның күп кенә мөһим төрҙәре буйынса был планды үтәп еткермәнеләр, был үтәлмәүҙе аҙыраҡ мөһим булған продукцияны өҫтәмә рәүештә эшләп сығыу менән ҡапланылар, был күрһәтелгән министерстволарҙың эшендә етешһеҙлек булып тора.

II. ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ПРОДУКЦИЯҺЫ ЭШЛӘП СЫҒАРЫУҘЫҢ ҮҪЕШЕ

1948 йылдың I кварталында промышленность продукцияһының иң мөһим төрҙәрен эшләп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, түбәндәгесә үҙгәрҙе:

	1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 1948 йылдың I кварталында процентҡарҙа
Суйын	136
Ҡорос	141
Прокат	143
Тимер юл рельстәре	157
Тимер торбалар	141
Баҡыр	136
Цинк	158
Күмер	120
Нефть	124
Бензин	133
Кәрәсин	124
Тәбиғи газ	122
Электр энергияһы	118
Магистраль паровоздар	211
Магистраль тауар вагондары	152
Троллейбустар	180
Йөк ташыусы автомобилдәр	133
Еңел автомобилдәр	220
Автобустар	194
Шарикоподшипниктәр	139
Металлургия оборудованиеһе	129
Ҡеүәте 100 киловатҡа тиклем булған электр моторҙары	187
Ҡеүәте 100 киловаттан юғары булған электр моторҙары	178
Металл киҫеүсе махсус һәм агрегат станоктар	140
Еп иләү машиналары	169
Туҡыу станоктары	171
Ауыл хужалығы машиналары	238
Тракторҙар	237
Трактор һабандары	224
Трактор сәскестәре	203
Трактор культиваторҙары	147
Молотилкалар	428
Каустик сода	135
Кальцийле сода	171
Минераль ашламалар (суперфосфат, азотлы һәм калийле ашламалар)	148
Синтетик буяуҙар	153
Автомобиль покрышкалары	163
Синтетик каучук	264
Төҙөлеш өсөн яраҡлы ағас материалдарын ташыу	146
Бысылған материалдар	138
Ҡағыҙ	119
Цемент	153
Шифер	147
Тәҙрә быяланы	135
Түбә ябыу өсөн йомшаҡ материалдар	126
Киже-мамыҡ туҡымалар	144
Йөн туҡымалар	132
Күндән эшләнгән аяҡ кейеме	118
Резинанан эшләнгән аяҡ кейеме	141
Ойоҡ-ойоҡбаштар	137
Ит	119
Мал майы	242
Үҫемлек майы	151
Балыҡ	103
Шәкәр	8,7 тапҡыр
Спирт	140
Һабын	154

1948 йылдың I кварталында бөтә промышленностең валовой продукцияһы тотош алғанда, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, 32 процентҡа үҫте.

III. АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫН ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ӘҘЕРЛӘҮ

1948 йылдың I кварталында ауыл хужалығында яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек, уҙған йылғыға ҡарағанда, юғары кимәлдә үткәрелде. Машина-трактор станцияларында һәм совхоздарҙа тракторҙарға ҡеҙгә-ҡышҡы ремонт билдәләнгән планға ярашлы рәүештә үткәрелде.

РСФСР-ҙың—Астрахань Брянск, Калининград, Кемерово, Ҡырым Куйбышев, Ленинград, Мәскәү, Мурманск өлкәләренең, Түбә автономиялы өлкәһенең һәм Төньяҡ Осетия АССР-ының, Украин ССР-ының — Винница, Волынь, Днепропетровск, Дрогобыч, Житомир, Закарпатье, Запорожье, Измаил, Каменец-Подольск, Киев, Львов, Николаев, Одесса, Полтава, Ровно, Сталино, Сумск, Тернополь, Харьков, Херсон, Чернигов, Черновицы өлкәләренең, Белорус ССР-ының, Үзбәк ССР-ының, Ҡаҙаҡ ССР-ының, Азербайжан ССР-ының, Латыш ССР-ының, Әрмән ССР-ының, Төркмән ССР-ының, Эстон ССР-ының машина-трактор станциялары тракторҙар ремонтлау планын срогынан алда үтәнеләр.

Колхоздарҙа I кварталда сәсеүлек майҙандарын киңәйтеү буйынса билдәләнгән программаға ярашлы рәүештә яҙғы сәсеүгә әҙерлек өсөн орлоҡ туплау нигеҙҙә тамамланды. 1948 йылдың 1 апреленә, уҙған йылғыға ҡарағанда, бөртөклө аплыҡ культураларының орлоғо бер ярым тапҡырға артығыраҡ әҙерләнгән.

IV. ТИМЕР ЮЛ ҺӘМ ДИҢГЕҘ ТРАНСПОРТЫНДА ЙӨК ӘЙЛӘНЕШЕНЕҢ АРТЫУЫ

1948 йылдың I кварталында тимер юлдарҙа тәүлегенә йөк тейәү, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, уртаса 134 процент тәшкил итте. Тәүлегенә күмер тейәү уртаса 16 процентҡа, кокс — 19 процентҡа, нефть — 24 процентҡа, руда — 60 процентҡа, ҡара металдар — 46 процентҡа, иген — 51 процентҡа, он — 72 процентҡа, тоҙ—81 процентҡа, ағас йөктәр—53 процентҡа, цемент — 62 процентҡа артты.

I кварталда тимер юл транспортында тәүлегенә йөк тейәүҙең дөйөм планы уртаса 103 процентҡа үтәлде, ә йөк тейәү планы айырым йөктәр буйынса үтәлмәне.

1948 йылдың I кварталында диңгеҙ транспортында йөк әйләнеше, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, 60 процентҡа үҫте. Диңгеҙ транспорты йөк әйләнешенең квартал планын 116 процентҡа үтәне.

V. ХАЛЫҠ ХУЖАЛЫҒЫНДА КАПИТАЛЬ ЭШТӘРҘЕҢ ҮҪЕШЕ

1948 йылдың I кварталында халыҡ хужалығы буйынса бөтә капиталь эштәр күләме, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, тотош алғанда 119 процент тәшкил итте, шул иҫәптән күмер промышленносе буйынса капиталь эштәр күләме 121 процент, ҡара һәм төҫлө металлургия буйынса — 116 процент, еңел һәм аҙыҡ промышленносе буйынса—116 процент, транспорт буйынса — 127 процент һәм торлаҡ төҙөлешө буйынса — 140 процент тәшкил итте.

Хөкүмәттең күрһәтмәләренә ярашлы рәүештә төҙөлеш ойошмаларында аҡсаларҙы һәм материаль ресурстарҙы әрәм-шәрәм итеүҙе, шулай уҡ бик күп объекттарҙа эшсе көсөн файҙаһыҙға ҡулланыуҙы бөтөрөү буйынса һәм был ресурстарҙы, барыһынан элек, производство ҡеүәттәренә өҫтәмә үҫеш һәм өҫтәмә продукция бирә алыусы мөһим төҙөлештәргә туплау буйынса эш алып барыла.

VI. КАРТОЧКА СИСТЕМАҺЫ БӨТӨРӨЛГӘНДӘН ҺУҢ ТАУАР ӘЙЛӘНЕШЕНЕҢ КИҢӘЙЕҮЕ

1947 йылдың декабрендә хөкүмәт тарафынан аҡса реформаһы үткәрелеүе һәм халыҡты тәьмин итеүҙең карточка системаһы бөтөрөлөүе нигеҙендә киң йәйелдерелгән совет сауҙаһына күсеү тормошҡа ашырылды.

1948 йылдың I кварталында государствоның ваҡлап һатыу һәм кооператив сауҙаһы органдарында аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарын һатыу байтаҡ үҫте. 1948 йылдың I кварталында икмәк һатыу, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда 72 процентҡа, шәкәр һатыу — 2,7 тапҡырға, балыҡ продукттарын һатыу — 25 процентҡа, мал майҙарын — 13 процентҡа, үҫемлек майын — 11 процентҡа, кондитер изделиеләрен — 57 процентҡа, ярма һәм макарон изделиеларен — 52 процентҡа, киже-мамыҡ туҡымаларын — 44 процентҡа, ебәк туҡымаларын һатыу — 44 процентҡа артты.

Государствоның ваҡлап һатыу буйынса тауар хаҡтарының кәметелеүе, карточкалар бөтөрөлөүе һәм аҡса реформаһы үткәрелеүе айҡанлы колхоз һәм кооператив баҙарының хаҡтары байтаҡ кәмене, государствоның ваҡлап һатыу буйынса тауар хаҡтары кимәленә яҡынлашты. Быйның һөҙөмтәһендә, 1948 йылдың I кварталында колхоз баҙарындағы хаҡтар, 1947 йылдың I кварталындағы хаҡтарҙың кимәленә ҡарағанда, 31 процент тәшкил итте, йәғни өс тапҡырҙан да артығыраҡҡа кәмене, ә ҡалаларҙа кооператив баҙарындағы хаҡтар 1948 йылдың I кварталында, 1947 йылдың I кварталындағы хаҡтар кимәленә ҡарағанда, 45 процент тәшкил итте йәғни ике тапҡырҙан да артығыраҡҡа кәмене.

VII. ҺУМДЫҢ ҺАТЫП АЛЫУ ҺӘЛӘТЛЕГЕНЕҢ ҺӘМ РЕАЛЬ ХЕҘМӘТ ХАҠЫНЫҢ КҮТӘРЕЛЕҮЕ

Аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына государствоның ваҡлап һатыу буйынса хаҡтарының кәмеүе, шулай уҡ кооператив сауҙала һәм колхоз баҙарында хаҡтарҙың төшөүе һөҙөмтәһендә, һумдың һатып алыу һәләтлеге 1948 йылдың I кварталында 41 процентҡа күтәрелде.

1948 йылдың I кварталында эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡы хаҡтарҙың кәмеүе һәм һумдың һатып алыу һәләтлегенең артыуы һөҙөмтәһендә, шулай уҡ хеҙмәт хаҡының артыуы айҡанлы, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, уртаса алғанда 51 процентҡа артты.

Хаҡтарҙың түбәнәйеүе һәм һумдың һатып алыу һәләтлегенең күтәрелеүе тураһындағы юғарыла күрһәтелгән иҫәптәрҙә 1948 йылдың 10 апрелендә, йәғни I кварталдан һуң хаҡтарҙың түбәнәйтелеүе иҫәпкә алынманы.

VIII. ЭШСЕЛӘР ҺӘМ ХЕҘМӘТКӘРҘӘР ҺАНЫНЫҢ АРТЫУЫ ҺӘМ ХЕҘМӘТ ЕТЕШТЕРЕҮСӘНЛЕГЕНЕҢ ҮҪЕҮЕ

1948 йылдың I кварталында халыҡ хужалығында эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең дөйөм һаны, 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, 2 миллион кешегә артты; шуның менән бергә промышленностағы эшселәр һаны бер миллион кешегә артты. 1948 йылдың I кварталында квалификациялы 150 мең йәш эшсе фабрика-завод эшенә өйрәтеү мәктәбен тамамлап промышленносҡа эшкә ебәрелде.

Промышленностең күпселек тармаҡтары государство планы тарафынан хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү буйынса I кварталға билдәләнгән заданиене үтәне. Шуның менән бергә, промышленностә эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге 1948 йылдың I кварталында, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, 21 процентҡа, шул иҫәптән машиналар төҙөү промышленносендә — 34 процентҡа, ҡара металлургияла — 36 процентҡа үҫте.

Карточкаларҙы бөтөрөү, аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына түбәнәйтелгән хаҡтарға күсеү һәм һумдың һатып алыу һәләтлеге артыу айҡанлы эшсе көсөнөң производствоға килеүе артты һәм бөтә ерҙә, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде. Шуның менән бергә, эшселәрҙең эшләп сығарыуҙары артыуы һәм пландарҙың үтәлеүе һәм арттырылып үтәлеүе иҫәбенә аҡсалата хеҙмәт хаҡы күтәрелде.

IX. ОККУПАЦИЯЛА БУЛҒАН РАЙОНДАРҘА ХУЖАЛЫҠТЫ АЯҠҠА БАҪТЫРЫУ

Оккупацияла булған районларҙа промышленностең валовой продукцияһы 1948 йылдың I кварталында, 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, 59 процентҡа артты шул уҡ ваҡытта суйын иретеү 75 процентҡа, ҡорос ҡайнатыу 97 процентҡа, прокат етештереү — 103 процентҡа, электр энергияһы етештереү — 33 процентҡа, цемент етештереү — 67 процентҡа үҫте.

СССР-ҙың был районларында 1948 йылдың I кварталында 3 миллиард һумлыҡ күләмдә үҙәкләштерелгән капиталь эштәр башҡарылды, шул иҫәптән ҡалаларҙа 350 мең квадрат метр торлаҡ майҙаны һәм ауыл ерҙәрендә 9 мең өй төҙөлдө һәм аяҡҡа баҫтырылды.

X

1948 йылда, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың хәл иткес йылында, халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү государство планы заданиеләрен уңышлы үтәү һәм арттырып үтәү өсөн 1948 йылдың I кварталында предприятиеләрҙә, төҙөлештәрҙә, колхоздарҙа МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа эшселәр, колхозсылар һәм интеллигенция араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде.

СССР Министрҙар Советының Государство план комитеты.

Икенсе бөтә донъя һуғышы нисек әҙерләнгән

Совет Информбюроһының «Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән тарихи белешмәһендә Икенсе Бөтә донъя һуғышы башланып алдынан булған ваҡытҡа ҡағылған документтарҙың һәм материалдарҙың баҫып сығарыласағы тураһында белдерелгәйне. Был Германия сит ил эштәре министерствоһы документтәре, совет ғәскәрҙәре Берлинға инеп барып ингәндән һуң уҙар тарафынан ҡулға төшөрөлгәндәр. Хәҙерге ваҡытта СССР Сит ил Эштәре Министерствоһы тарафынан был документтарҙың беренсе томы баҫып сығарылды.*)

Беренсе томға ингән документтәр Гитлер агрессияһының әҙерләнеү барышын, уның Англия һәм Франция хөкүмәттәре булышлығында һәм АҠШ ярҙамында тормошҡа ашырылғанын асып һалалар, Икенсе Бөтә донъя һуғышы башланып алдынан булған ваҡытҡа ҡағылған документтәрҙе һәм материалдарҙы бөтә кешегә белдереү тарихте боҙоп күрһәтеүселәргә емергес яңы удар бирә һәм Икенсе Бөтә донъя һуғышы өсөн ысын ғәйепле кешеләр тураһында тарихи дөрөҫлөктө асыҡҡа баҫтыра. «Тарихи дөрөҫлөк, — тип әйтелә «Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән тарихи белешмәлә, — шунан тора, — Гитлер агрессияһы шуның өсөн мөмкин булды, беренсенән, Америка Ҡушма Штаттары ҡыҫҡа срокта герман агрессияһының хәрби-экономик базаһын тәҙеүҙә немецтарға ярҙам иткәндәр һәм шулай итеп был агрессияны ҡоралландырғандар һәм, икенсенән, Англия-Франция идара итеүсе ҡругтары, коллектив именлектән баш тартып, тыныслыҡ һөйөүсе илдәрҙең сафтарын таратҡандар, был илдәрҙең агрессияға ҡаршы берҙәм фронтын тарҡаттылар, немец агрессияһы өсөн юл таҙарттылар һәм Гитлерға Икенсе Бөтә донъя һуғышын башлап ебәреүгә ярҙам иттеләр».

Англия, Франция һәм АҠШ-тың идара итеүсе ҡругтарының һуғыштан алда тышҡы политикаһынан бөтә хәйләһе герман империалистарының илбаҫарлыҡ теләктәрен хуплауҙан, Гитлер агрессияһын ҡоралландырырға тырышыуҙан һәм уны Көнсығышҡа, СССР-ға ҡаршы йүнәлдереүҙән торған.

Германия сит ил эштәре министерствоһы архивтарын өйрәнеү Англия менән Францияның ул саҡтағы идара итеүселәренең политикаһының ҡараңғы яғын асып бирә. Документтәр, Гитлер Германияһы башлыҡтары менән турыдан-тура һүҙ берләштереүҙән асыҡ күренеп торғанлығын дөрөҫләйҙәр. Англия һәм Франция министрҙары үҙҙәрен тыныслыҡ яҡлылы итеп күрһәткән булып, ғәмәлдә Гитлерҙың агрессив пландары менән тулыһынса риза булғандар, уларға ярҙам иткәндәр һәм гитлерсе кликаны һуғышты тиҙерәк башлап ебәреүгә этәргәндәр.

Беренсе том Гитлерҙең 1937 йыл 19 ноябрҙә Британия министры, печать һаҡлаусы лорд Галифакс менән булған бесеҙәһының яҙмаһы менән башлана. Британия министры үҙенең һүҙен Гитлер менән лично аңлашыу юлы менән «Англия һәм Германия араһында үҙ-ара яҡшы аңлашыуға» өлгәшергә тырышыуы тураһында белдереүҙән башлаған. Галифакс, үҙ исеменән генә түгел, бәлки коммунизмға ҡаршы көрәштә Гитлерға «бөйөк хеҙмәт» күрһәтеү «оло менән һуғарылған» бөтә Британия министрҙары исеменән сығыш яһауын айырыуса ныҡлап билдәләгән. Галифакс фашистик Германияны тап-тура «большевизмға ҡаршы Көнбайыш бастионы» тип атап, СССР-ға ҡаршы Гитлер агрессияһы менән халыҡ-ара реакцияның ҡыҙыҡһынғанлығын аңлатҡан.

Англия хөкүмәте исеменән Галифакс, дүрт держава Европала тулыһынса хакимлек итһен өсөн Англияның һәм Францияның фашистик «Берлин—Рим осена» ҡушылырға әҙер булмауҙары тураһында белдергән Галифакс Версаль ярашыу договорын юҡҡа сығарыуға ярҙам итергә тәҡдим иткән.

Билдәле, Англия империалистары Германияға уның Беренсе Бөтә донъя һуғышынан һуң тартып алынған колонияларын кире ҡайтарып бирергә йыйылмағандар. Шуға күрә Галифакс, колониаль мәсьәләнең Европаның ярҙамы тураһындағы дөйөм мәсьәләнең бер өлөшө рәүешендә генә ҡаралыуы мөмкин, тигән һәм Великобританияның Германияға Данцигте, Австрияны һәм Чехословакияны бирергә әҙер булыуы тураһында асыҡтан-асыҡ белдергән. Шулай итеп, Англия хөкүмәте Гитлерға Европаның күп кенә илдәрен колонияға әйләндерергә мөмкин булыуы тураһында фекер биргән һәм агрессияға юл күрһәткән. Шуныһы характерлы, ул ваҡытта Германия хөкүмәте Данцигте һәм Чехословакияны үҙенә биреүҙе талап итергә ҡыйҙмаған һәм тик үҙенең Австрияға булған дәғүәләре тураһында ғына белдергән. Британия министры үҙе Германияның алырға теләгәненән дә күберәк тәҡдим иткән һәм Европала бик иҫкә территорияны баҫып алыуға ҡотортҡан.

Австрияға һәм Чехословакияға ҡаршы Германия агрессияһын тиҙләтеү Галифакстың Гитлер менән бесеҙәһының турыдан-тура һөҙөмтәһе булған. Германия сит ил эштәре министры Нейраттың Германияның Прагалағы посланнигенә биргән директивалары шул турала дөрөҫләйҙәр.

Күп тә үтмәй Гитлерҙең Британия посолы Гендерсон менән йәшерен бесеҙәһе булған. Бесеҙә яһаусылар бер-береһенән сер йәшереүҙе кәрәк тип иҫәпләмәгәндәр. Гендерсон, Англияның тәҡдимдәре — «Германия менән ысын йөрәктән дуҫлыҡ өсөн нигеҙ һалыуға» тырышыу ул, Европала үҙгәрештәр уның эҙлогы була алалар, быға ризалыҡ Галифакс тарафынан бирелгән ине, тигән. Гендерсон бесеҙә ваҡытында Британияның премьер-министры Чемберлендә коллектив именлеккә ҡаршы көрәше өсөн бик ныҡ маҡтаған. Гитлер, үҙ-ара ярҙам тураһында совет договорҙарынан ҡурҡҡанлығын әйтеп яуап биргән һәм «Европаны Россиянан башҡа берләштереүҙе», йәғни Англия менән Францияның Советтар Союзын айырып ҡалдырыуҙы тормошҡа ашырыуҙарын һәм шуның менән герман агрессияһына юл асыуҙарын талап иткән. Гендерсон Гитлерҙең талаптарының ҡабул ителәселек булыуын аңлатҡан.

Ләкин был юлбаҫарлыҡ уйҙарын тормошҡа ашырыу юлында Советтар Союзы серьез кәртә булған. Тап шуға күрә лә үҙ-ара татыу булған фашистар һәм реакционерҙар СССР-ҙы политик яҡтан айырып ҡалдырыуға ынтылырға тырышҡандар. Беҙҙең илебеҙ, бынан 10 йыл элек булған кеүек, хәҙер ҙә, яңы һуғыш уты тоҡандырыусыларҙың юлында бер серьез кәртә булып торғанға күрә лә халыҡ-ара мәсьәләләрҙе хәл итеүҙән СССР-ҙы ситләштереү империалистарҙың һатаҡлан хыялдары булып тора. Билдәле, хәҙер бындай маташыуҙар бигерәк тә ышаныслыһыҙҙар: сөнки СССР-ҙың авторитеты һәм йоғонтоһо үлсәп бөткөһөҙ үҫте.

Гитлер уйҙары Англия һәм Франция министры тарафынан тырышлыҡ менән һәм һис бер төрлө ҡаршылыҡһыҙ тормошҡа ашырылғандар. Ҡоторған «фюрер», үҙ-ара ярҙам итешеү тураһындағы договорҙарҙы юҡҡа сығарырға кәрәк, тигән, Франция сенатының сит ил эштәре комиссияһы шунда уҡ үҙ-ара ярҙам тураһында Франция-Чехословакия һәм Франция-Совет договорҙарын юҡҡа сығарыу юлдарын эҙләй башлаған.

Гитлер Германияһы Австрияны баҫып алды. Англия газеталарында, Чемберлен һәм Галифакс был уңай менән Риббентропҡа бөлдороу һәм талап итеү тонында тәҙелгән иҫкәртеү яһаныулар, тигән белдереү урынлаштырылды. Был «иҫкәртеүҙең» ысын характеры тураһында Герингтың ул саҡта Лондонда булған Риббентроп менән телефон аша һөйләшеүҙәренең яҙмаһына ҡарап фекер йөрөтөргә мөмкин. Риббентроп: «Икеһенән дә — Галифакстан да һәм Чемберленән дә алған тәьҫирем — бик әйбәт» тигән. Быға Геринг: «Ике милләт бер-береһен табыштылар, бер-береһенә ҡул бирҙеләр, шатланыштылар һәм тантана итәләр...» тип яуап биргән. Гитлерселәр Англияның ул ваҡыттағы идара итеүсе ҡругтары менән уртаҡ тел тапҡандар: теләгәре лә, былары ла араҡ килеп бер үк маҡсаттарға ирешергә тырышыусы фекерҙәш кешеләр булып сыҡҡандар.

Документтәр йыйынтығында яңы һуғыш ҡурҡынысына ҡаршы көрәш тураһындағы мәсьәләне тикшереү өсөн халыҡ-ара конференция саҡырыу хаҡында Советтар Союзы тарафынан яһалған тәҡдимгә Англияның яуабы килтерелә. Ул саҡта, фашистар Австрияны баҫып алғандан һуң, был ҡурҡыныс ҡискен рәүештә артты. Британия хөкүмәте бындай конференцияны маҡсатҡа ярашлы түгел, тип яҙҙы. Чемберлен хөкүмәте Гитлер агрессияһы юлынан ҡаршылыҡтарҙы бик тырышып алып ташлау менән шөғөлләнә. Ул инде Чехословакияны баҫып алыу өсөн уңайлы шарттар әҙерләгән була. 1938 йылдың 28 апрелендә инде, Гитлер хатта Судет өлкәһен талап итеүҙән элек, Чемберлен Францияның премьер-министры Даладьеға, Германияға Чехословакияны юҡ итеү өсөн ҡомасауларлыҡ средстволарҙы күрмәйем, тигән. Һәм был Германия әле хәрби конфликттан ҡурҡҡан саҡта, шантаж һәм баҫып алыуҙың емерелеүе мөмкин булған саҡта әйтелгән.

Германияның Лондондағы посолы Дирксен Англияның идара итеүсе ҡругтарының политикаһына тулы баһа биргән. Ул 1938 йыл 10 июлдә Германияның сит ил эштәре министерствоһына яҙған белдереүендә, фашистик государстволар менән «килешеү политикаһы» Чемберлен — Галифакс кабинеты (Галифакс ул ваҡытта инде сит ил эштәре министры булып ала) «программаһының беренсе һәм иң мөһим пункты булды һәм булып ҡала» тип яҙған.

Британияның политик деятелдәре, Германияны агрессия эшен тиҙерәк тормошҡа ашырыуға этәреп, хатта уға үҙҙәренең турыдан-тура хәрби ярҙамдарын вәғәҙә итергә лә әҙер булалар. Чемберләндең Гитлер вәкиле, Данциг фашистарының етәксеһе Ферстер менән булған бесеҙәһы был йәһәттән бик ҡыҙыҡлы булып тора. Был бесеҙә тураһындағы яҙыуҙы Черчилль үҙе төҙөгән. Ул йылдарҙа Черчилль Чемберлен политикаһына, Гитлер Германияһы менән һүҙ ҡуйышыу политикаһына ҡаршы сығыш яһап, халыҡ массаларының иғтибарын булаҫаҡ ҡурҡыныстан ситкә борҙо һәм консерватив партия сафтарында шундай кешеләр бар, улар Гитлер Германияһы менән ниндәй ҙә булһа килешеүҙәргә юл ҡуймаясаҡтар, тигән иллюзия тыуҙырырға тырышты. Ә ысынында Черчилль бындай килешеүҙәрҙе Чемберлендән кәм яҡламаған. Ул Ферстер менән бесеҙә ваҡытында, әгәр Германия СССР-ға ҡаршы һуғышҡа ҡалһа, хатта был һуғыш Советтар Союзының Чехословакия менән үҙ-ара ярҙам тураһындағы договор буйынса үҙ йөкләмәләрен үтәү һөҙөмтәһендә килеп сыҡһа ла, «Англияны һәм Францияны үҙҙәренең бөтә көстәре менән Германияға ярҙамға килергә» мәжбүр итеүсе килешеү төҙөргә тәҡдим иткән. СССР-ға ҡаршы һуғышҡаны өсөн Германияға наградала сифатында Черчилль, атап алғанда, Дунай бассейне илдәрен бирергә тәҡдим иткән. Англия һәм Германия бөтә донъяны үҙ-ара бүлешеп алыу тураһында һүҙ ҡуйышһындар тип тәҡдим иткән Ферстер һүҙҙәренә Черчилль һис шикһеҙ ҡыҙыҡһыныу менән ҡараған.

Документтәр йыйынтығына Англия менән Францияның Германияға һис киҫекмәҫтән Судет өлкәһен биреүҙе талап итеп Чехословакияға яһаған ультиматумының тексы индерелгән. Шулай уҡ унда Чехословакия хөкүмәтенең яуабы ла килтерелә. Чехословакияның ҡаршы килеүе айҡанлы Британия хөкүмәте Чехословакиянан үҙ яуабын һис киҫекмәҫтән кире алыуын талап иткән һәм әгәр яуабын кире алмаһа, бик ауыр эҙемтәләр буласаҡ, тип ҡурҡытҡан. Шулай итеп, Англия һәм Франция Чехословакияны ҡул-аяғын бәйләп, Германияға тотоп бирҙеләр. Бары тик Советтар Союзы ғына һис киҫекмәҫтән берҙәм һәм эшлекле ярҙам күрһәтергә тәҡдим итеп, Чехословакияны яҡлап әйҙерғиялы һәм эҙмә-эҙлекле сығыш яһаны.

Империалистарҙың 1938 йыл 29—30 сентябрҙә Мюнхендә булған яманатлы сыҡҡан һөйләшеүҙәренең барышы һәм унда булған телмәрҙәр Германия вәкилдәре тарафынан яҙып алынғандар. Документтәр йыйынтығына урынлаштырылған был яҙмалар Чемберлендең һәм Даладьеның Гитлер һәм Муссолини менән һис шикһеҙ теләктәш булғанлыҡтарын күрһәтәләр. Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар ул ваҡытта ла бер-береһенән нәмә лә булһа йәшереүҙе кәрәк тип иҫәпләмәгәндәр. Германия Чехословакияны баҫып алырға әҙер һәм Мюнхен кәңәшмәһенең бурысы «был акцияның көслөк характерында» булыуҙан «мәхрүм итеүҙән» тора, тип Гитлер үҙенең телмәрендә асыҡтан-асыҡ әйткән. Гитлер етеҙ хәрәкәт итеүҙе талап иткән. Чемберлен үҙен кәңәшмәгә саҡырған өсөн Гитлерға рәхмәт белдергән һәм йылдам хәрәкәт итергә кәрәк тип иҫәпләүен әйткән.

Даладьеның телмәре кәңәшмәнең барышы яҙылған яҙмаларҙа түбәндәгеса алынған: «Францияның премьер-министры Даладье лә инициативаға күрһәткәне өсөн шулай уҡ фюрерға рәхмәт әйтте. Ул фюрер менән әңгәмәшеү мөмкинлеге булыуына шат. Ул да Чемберлен әфәнде кеүек уҡ, гәйәт ҙур йылдамлыҡ менән эш итергә кәрәк тигән фекерҙә... Франция хөкүмәте Чехословакия хөкүмәте тарафынан был эшта яһалған кәртәләргә һис бер түҙеп тора алмаҫ».

Шулай итеп, Даладье Гитлер алдында үҙенең ялағайланыуы һәм ярамһыҡланыуы менән хатта Чемберлендән дә арттырып ебәргән. Шул уҡ ваҡытта, һуңғы һүҙ Британия премьерында ҡала, ул да, шулай уҡ кәңәшмәлә ҡатнашҡан башҡа кешеләр ҙә, «Чехословакия хөкүмәте үҙенең ахмаҡлығы һәм тиңкәрелеге менән территорияны таҙартыуҙан баш тартмаһын» өсөн хәстәрлекте үҙ өҫтөбөҙгә алырға тейешбеҙ, тип белдергән.

Чемберлен үҙенең йомғаҡлау һүҙендә, «Европа политикаһын артабан үҫтереүҙә», бәгин артабан агрессия эшендә, реакция Гитлерҙан күпте көтә, тигән фекерен белдергән.

Бөтә эш бөткәс һәм Германия менән Италия делегациялары сығып киткәс, кәңәшмә залына Чехословакия делегацияһы саҡырып индерелгән; ул уға тиклем гостиницала полиция күҙәтеүе аҫтында булған. Уға приговорҙы — алдан әҙерләп ҡуйылған ярашыуҙы уҡып сыҡҡандар. Чехословакияның сит ил эштәре министерствоһы яҙыуында, Чехословакия делегацияһына «был приговорға апелляция яһау хоҡуҡы һәм уға төҙәтмә индереү мөмкинлеге бирелмәй, тип тулаҫ ҡына итеп, шуның менән бергә бер француз тарафынан аңлатылды» тип күрһәтелә.

Мюнхендәге кәңәшмәлә Америка Ҡушма Штаттарының вәкилдәре булмаған. Ләкин АҠШ-тағы монополистик ҡругтарҙың бөтә политикаһы Гитлер Германияһы менән килешеүҙе тормошҡа ашырыуға йүнәлтелгән һәм уның агрессия нейәттәренә булышлыҡ итеүҙән торған. Польшаның Парижлағы посолы менән һөйләшкән ваҡытында Францияның сит ил эштәре министры Боннэ был турала әйткән, ул «Англия тарафынан ғына түгел, бәлки Америка Ҡушма Штаттары тарафынан да Францияға күрһәтелгән булышлыҡ тураһында» хәтергә төшөргән. Ул ваҡытта атаҡлы реакционер, Советтар Союзының дошманы һәм гитлерселәрҙе үҙ ҡанаты аҫтына алыусы Буллит Францияның АҠШ-тағы посолы ине.

Мюнхенда булған килешеү Чехословакияны гитлерсе илбаҫарҙар ҡулына әҙгәләү өсөн бирҙе. Хурлыҡлы Мюнхен политикаһы ҡәбәхәт хыянат синониме булып әүерелде. АҠШ-тың государство департаментының һәм Англия менән Франция сит ил эштәре министерстволарының тарихте боҙоп күрһәтеү юлы менән Мюнхендәге хыянат геройҙарын аҡларға килбәтһеҙ рәүештә тырышыуҙары был фактыны алып ташлай алмай.

«Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән тарихи белешмә ошондай бәхәсһеҙ һығымтаға килтерҙе: Англия менән Францияның Мюнхендәге ҡылыҡтары Чехословакия халҡына һәм уның республикаһына ҡарата Англия һәм Франция хөкүмәттәре тарафынан бығаса ишетелмәгәнсә хыянат акты был государстволар политикаһында осраҡлы эпизод ҡына булмаған, ә Гитлер агрессияһын Советтар Союзына ҡаршы йүнәлтеүҙе маҡсат итеп алған политиканың мөһим тармағы булғанлығына һис бер шик ҡалдырмай.

Мюнхен килешеүенең ысын мәғәнәһе ул ваҡытта уҡ И. В. Сталин тарафынан фаш ителде, ул: «Советтар Союзына ҡаршы һуғыш башларға алған йөкләмәләре өсөн хаҡ итеп немецтарға Чехословакияның райондарын бирҙеләр», — тине.

Мюнхен килешеүе Гитлерға Чехословакияны тотоп биреү менән генә сикләнмәне. Англия һәм Франция хөкүмәттәре Гитлер Германияһы менән киң политик килешеүҙәргә ҡул ҡуйырға ҡабаландылар. Англия—Германия һәм Франция—Германия декларациялары ошондай килешеү булдылар. Был декларациялар Советтар Союзын тулыһынса айырып ҡалдырыуға йүнәлтелгән декларациялар ине. Англия менән Франция, беҙ Гитлер Германияһына ҡаршы һуғыш маҡсаҡбыҙ, тип белдергәндәр. Был йөкләмәне Англия һәм Франция хөкүмәттәренең коллектив рәүештә тыныслыҡ тәьмин итеүҙән бөтөнләй баш тартыуҙары, тип, донъяны фашистар менән Англия һәм Францияның идара итеүсе ҡругтары араһында тәләгәнсә бүлеп алырға маташыу тип аңларға кәрәк ине.

Польшаның Лондондағы посолы үҙенең хөкүмәтенә 1938 йылдың 16 декабрендә былай тип хәбәр иткән: «Шуны танырға кәрәк, Чемберлен әфәнде һайлап алынған линияны ҙур ныҡышмалылыҡ менән, эҙмә-эҙлекле рәүештә еренә еткерә; был линия уны дүрт тәүҙең пактына һәм «Европала яңы тәртип» проекттарын тормошҡа ашырыуға килтерергә тейеш... Премьер (спорт өлкәһенән артыҡ яңыҡ булмаған сағыштырманы ҡулланғанда) Англия ҡапҡаһын яҡлап алып ҡалды һәм, шулай итеп, уйынды Европаның Көнсығышына күсерҙе... Премьерҙең Көнсығышҡа табан Германияның юл тотоуына ҡаршы сығып яһауҙан официаль рәүештә ҡасыуы ла хәҡиҡәт булып тора».

Англия, Франция һәм АҠШ-тың идара итеүсе ҡругтарының политикаһы шундай булған. Иғлан ителгән документтәр гитлеризм булышсыларының ысын маҡсаттарын фашлайҙар. Документтәр Англия, Франция һәм АҠШ-тың ул йылдарҙа һәм хәҙер ҙә киң рәүештә халыҡҡа ҡаршы пландар менән йөрөгән идара итеүсе ҡругтарының мәкерҙәрен күрһәтәләр. Был документтәр халыҡтарҙы һиҙгер булырға, хәҙерге ваҡытта бөтә донъя өҫтөнән хакимлекке дәғүә итеүселәр әҙерләгән яңы Мюнхенгә юл ҡуймаҫҡа саҡыралар.

Үҙ ваҡытында Англияның, Францияның һәм АҠШ-тың монополистары һәм идара итеүсе ҡругтары Гитлерҙе һимерттеләр, Германияның хәрби ҡеүәтен ирҡаланәләр. Мюнхенселәр үҙҙәренең тупаҫ һәм ҡәбәхәт политикалары менән Европа халыҡтарын, шул иҫәптән үҙ илдәренең халыҡтарын да, ауыр бәләгә, һәләкәтле һуғыш утына ташланылар. Кешелек донъяһы быны хәтерҙән сығармаҫҡа тейеш, сөнки мюнхенселәр терелар, улар халыҡтар араһына дошманлыҡ, илдәр араһындағы мөнәсәбәттәргә кескерәкешлек сәсеүҙе дауам итәләр, бөтә донъя өҫтөнән хакимлеккә дәғүә итеүсе яңы кешеләр интереҫе өсөн, үҙ халыҡтарына хыянат итеү политикаһын дауам итәләр.

Ул ваҡыттарҙа «уның ғәли янаптары оппозицияһы» ролен уйнаған Англия лейбористары Чемберлендә уның тышҡы политикаһында ныҡ яҡланылар. Хәҙер Черчилль Мюнхен замандын кире ҡайтарыу тураһында хыялланыусы «социалистарға» — Эттли менән Бевинға алҡышлай. СССР-ға һәм ысын демократия илдәренә ҡаршы ҡоторонҡо рәүештә ялағыу кампанияһы (ул ваҡыттарҙа ла, һәм хәҙер ҙә) Мюнхен политикаһы элементтәренең береһе булып тора.

Был йыйынтыҡты уҡып совет гражданины беҙҙең Совет Ватаны өсөн, саф күңелле азатлыҡ политикаһы, тыныслыҡ политикаһы булған беҙҙең тышҡы политикабыҙ өсөн ҙур патриотик ғорурлыҡ менән һуғарыла. Советтар Союзы прогрессив кешелек донъяһының интерестарын, тыныслыҡ, азатлыҡ һәм демократия интерестарын ныҡлы рәүештә яҡлай. Һуғыштан һуңғы шарттарҙа Советтар Союзы империалистарҙы һәм уларҙың агрессия һәм экспансия политикаһын фаш итеп, империализмға ҡаршы демократик лагерҙең башында тора.

Г. А. ДЕБОРИН,
Экономик фәндәр докторы.

---
*) «Икенсе Бөтә донъя һуғышы башланыу алдынан булған документтар һәм материалдар» I том. 1937—1938 йыл ноябрь. Германияның сит ил эштәре министерствоһы архивынан. Госполитиздат, 1948 йыл, 308 бит, хаҡы 8 һум.

Колхоздарҙа умартасылыҡты киңәйтеү өсөн

Апрель айында РСФСР-ҙың бөтә райондарында умартасылағыҫың семинарҙары үткәреләсәк. Был семинарҙа колхозсылар илдең алдынғы умартасыларының эш тәжрибәләре менән танышасаҡтар.

Ағымдағы йылда РСФСР колхоздарында умартасылыҡ эше байтаҡ киңәйтеләсәк. Яңы умарталыҡтар ойошторола, колхоздарҙың базавой умарталыҡтары ҙурайтыласаҡ. Апрель, май айҙарында Краснодар, Ставрополь крайҙарындағы колхоздар Псков, Брянск, Калининград, Смоленск, Ленинград, Орел, Тула, Калуга, Мәскәү һәм башҡа өлкәләрҙәге колхоздарға ҙур күләмдә ҡаҙаҡта үрсетелә торған умарта ҡорттары күстәрен ебәрәсәктәр. Тик Краснодар крайы үҙе генә ошондаға кенә 12 мең күс ебәрәсәк. Великие Луки өлкәһенә, Приморье крайының Сахалин өлкәһенә ебәреү өсөн Татар АССР-ы ла шундай уҡ посылкалар әҙерләй.

РСФСР-ҙың урындағы промышленность министерствоһының предприятиелары 1948 йылда колхоздар өсөн 60 мең умарта эшләйәсәктәр.

Умартасылыҡтың алға киткән районларында тотош умарталыҡтары ойошторола.

(ТАСС).

ИТАЛИЯ МЕНӘН ЯРАШЫУ ДОГОВОРЫН ҠАЙТАНАН ҠАРАУ ТУРАҺЫНДА АНГЛИЯ, АҠШ ҺӘМ ФРАНЦИЯ ХӨКҮМӘТТӘРЕНЕҢ ТӘҠДИМЕНӘ ҠАРАТА

Әлегә тиклем хәбәр ителгәнсә, ошо йылдың 20 мартында СССР-ҙың Лондондағы Посольствоһы Англия Сит ил Эштәре Министерствоһының нотаһын алғайны. Был нотала Англия Хөкүмәте Совет Хөкүмәтенә Азат Триест территорияһын Италияға биреү маҡсатында Италия менән ярашыу договорын ҡайтанан ҡарау тураһында Америка Ҡушма Штаттары һәм Франция Хөкүмәттәре менән бергә һөйләшеүҙәр башларға тәҡдим итте. Советтар Союзының Вашингтондағы Посольствоһы АҠШ Государство Департаментенән һәм СССР-ҙың Парижлағы Посольствоһы Франция Сит ил Эштәре Министерствоһынан шундай уҡ нотаалар алдылар.

9 апрелдә СССР-ҙың Англиялағы Посолы вәкил Г. Н. Зарубин ошо мәсьәлә буйынса Англия сит ил эштәре министерствоһының икенсе хатын алды. Был хатта Италия Хөкүмәтенең күрһәтелгән һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашырға риза булыуы тураһында хәбәр ителде һәм Англия Хөкүмәтенең һөйләшеүҙәрҙе мөмкин тиклем тиҙерәк башлау тураһында тәҡдиме бар.

Юғарыла яҙылғандар айҡанлы СССР-ҙың Лондондағы Посольствоһы Совет Хөкүмәтенең ҡушыуы буйынса 13 апрелдә Англияның Сит ил Эштәре Министерствоһына түбәндәге нотаны ебәрҙе:

«Великобритания Хөкүмәтенең 20 март нотаһына ҡарата һәм Великобритания Сит ил Эштәре Министре Урынбаҫары ярҙамсыһының 9 апрелдә яҙған хатына яуап итеп, Совет Посольствоһы түбәндәгеләрҙе белдереү хөрмәтенә эйә:

Һеҙҙең тарафтан 9 апрель нотаһында мәсьәләнең ашығыс булыуы тураһында әйтелеү айҡанлы, Совет Хөкүмәте хатта уға һылтанылған торған Великобританияның 20 март нотаһында был мәсьәләнең ашығыс икәнлегенә бер ниндәй ҙә күрһәтмә юҡ, тип билдәләүҙе кәрәк таба.

Совет Хөкүмәте шул уҡ ваҡытта Министерствоның иғтибарын түбәндәгеләргә йүнәлтә: Италия менән ярашыу договоры, һуғышта ҡатнашыусы башҡа государстволар менән төҙөлгән ярашыу договоры кеүек, Сит ил Эштәре Министрҙары Советы тарафынан әҙерләнде, 21 государство ҡатнашлығында Париж конференцияһында тикшерелде, һуңынан уға ошо государстволар тарафынан ҡул ҡуйылды, ратификацияланды һәм бынан бары тик бер нисә ай элек кенә көсөнә инде.

Шуға күрә Италия менән ярашыу договорының ярашыу йәки айырым кәңәшмәләр үткәреү юлы менән теге йәки был өлөшөн ҡарау тураһындағы мәсьәләне хәл итергә кәрәк, тигән тәҡдимде Совет Хөкүмәте, демократизмдың элементар принциптарын боҙоусы тәҡдим булғанлыҡтан, ҡабул итеп булмаҫлыҡ тәҡдим тип иҫәпләй»

Бер үк ваҡытта СССР-ҙың Вашингтондағы һәм Парижлағы Посольстволары тарафынан АҠШ Государство Департаментенә һәм Франция Сит ил Эштәре Министерствоһына ошондай уҡ ноталар ебәрелде. (ТАСС).

ТАСС-тың белдереүе

Нью-Йорк һәм Лондон радиолары, Боготанан (Колумбияның башҡалаһы) алынған мәғлүмәттәргә һылтанып, һуңғы ике көн эсендә, Колумбия хөкүмәте Советтар Союзы менән дипломатик мөнәсәбәттәрҙе өҙөү тураһында белдерҙе, тигән хәбәрҙәр тараталар. АҠШ государство департаментының Вашингтондағы вәкиле лә шундай уҡ хәбәрҙе ҡабатланы. Шул уҡ ваҡытта, имеш һуңғы көндәрҙә Колумбияла булған ваҡиғалар коммунистик агенттар эшенең һөҙөмтәһе булып тора, бында «ике совет кешеһенең» йәки икенсе хәбәрҙә әйтелгәнсә, «ике рус кешеһенең» дә ҡатнашлығы бар тигән хәбәрҙәр таратыла.

ТАСС тарафынан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, СССР Сит ил Эштәре Министерствоһы һуңғы көндәрҙә Советтар Союзының Боготалағы миссияһы менән бәйләнеш тота алмаған. Был миссиянан һуңғы бер нисә көн буйынса Мәскәүҙән ебәрелгән һорауҙарға бер ниндәй ҙә яуап килмәй.

ТАСС, ниндәйҙер «совет» йәки «рус» агенттарының Боготалағы ваҡиғаларҙа ҡатнашыуҙары тураһында һәр төрлө хәбәрҙәр нигеҙлекһеҙ ялған булып тора һәм Советтар Союзына ҡарата дошмандарса маҡсаттарҙа таратыла, тип белдерергә полномочие алды.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Конференция карарҙарын тормошка ашырыу юлында

Макар районы партия ойошмаһы конференцияһы коммунистарҙы марксистик-ленинсе тәрбиәләүҙе киңәйтергә, агитация-пропаганда эшенә ... ВКП(б) райкомының партия-политик эште ныҡлы яҡшыртыуҙы талап иткәйне. Райком был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн конкрет саралар үткәрә башланы, партия-политик эште конференция ҡарарҙары нигеҙендә ҡайтанан үҙгәртеп ҡорҙо. Коммунистарҙың политик белем кимәлдәрен күтәреү, етәксе кадрҙарҙы идеологик яҡтан сыныҡтырыу максатында киске партия мәктәбе, төрлө ойошмаларҙа политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр эшләп килә. ВКП(б) члендары һәм кандидаттары партия уҡыуының төрлө формалары менән солғап алынды.

ВКП(б) райкомының пропагандисы иптәш Гәрәев етәкселек иткән «Шишмә» һәм Калинин исемендәге колхоздарҙағы политик мәктәптәр занятиеләре яҡшы әҙерлек менән, регуляр үткәрелә. Макар МТС-ы партия ойошмаһы эргәһендә ойошторолған «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәгенә менән агроном иптәш Кәримов етәкселек итә. Бында коммунистәр занятиеләргә яҡшы әҙерлек менән киләләр һәм актив ҡатнашалар.

Районда партия ойошмаларының секретарҙары, агитколлектив етәкселәре өсөн семинарҙар, инструктив кәңәшмәләр йыш үткәрелә башланы. Уларҙа политик темаларҙан лекциялар уҡыла. «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы» ...

Райкомдың партия кабинеты ла үҙенең эшен байтаҡ яҡшыртты. Ул партия-политик эштәрҙең үҙәгенә әйләнеп бара. Бында большевизмдең теорияһын һәм тарихын үҙ аллыңса өйрәнеүселәр өсөн консультациялар, лекциялар ойошторола, айырым темалар буйынса теоретик конференциялар үткәрелә. Район интеллигенцияһы арасында ла тәрбиә эштәрен яҡшыртыуға ныҡлы иғтибар бирелә башланы. Уҡытыусылар өсөн «Материалистик диалектиканың төп ҡанундары», «Йәш быуынды совет патриотизмы һәм милли ғорурлыҡ рухында тәрбиәләү» тигән темаларҙан докладтар уҡылды.

Райондың хеҙмәтсәндәре өсөн политик докладтар йыш үткәрелә башланы. Доклад менән сығыш яһау өсөн райондың етәксе партия, совет работниктәре йәлеп ителә. Конференциянан һуң төрлө темала 57 доклад ойошторолоп, уларҙы 5 меңдән артыҡ кеше тыңланы.

С. Сәйфуллин.

Политик белемдәрен күтәрәләр

Көйөргәҙе районындағы Государство йылҡысылыҡ заводы партия ойошмаһы коммунистарҙың политик белемдәрен күтәреүгә етди иғтибар бирә. «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәгенә 12 коммунист йәлеп ителде. Бында занятиеләр регуляр рәүештә эшләп килә. Түңәрәк етәксеһе иптәш Лисицин занятиеләргә алдан ныҡлы әҙерләнеп килә. Шуның арҡаһында түңәрәкте өйрәнеүселәр үҙ яҙмаларын тыңлайҙар һәм үҙҙәре ҙә актив рәүештә сығыш яһайҙар.

Партия ойошмаһы секретаре иптәш Сафронов коммунистарҙың үҙ аллыңса уҡып политик белемдәрен күтәреүҙәренә лә ныҡлы иғтибар бирә. Иптәш Сафронов үҙе был эштә күп ярҙам күрһәтә. Ул партия тарихын бөтәһе сығанаҡтар буйынса өйрәнә. Коммунист иптәш Борновский марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен үҙ аллыңа өйрәнеү өсөн ҙур эш эшләй.

Коммунистарҙың политик белемдәрен күтәреү ыңғай һөҙөмтәләр бирә. Партия члендары социалистик ярыш менән оҫтараҡ етәкселек итә башланылар.

Н. Ғисмәтуллин.

Тәтешле коммунистәренең уҡыуҙары

Быйылғы уҡыу йылында Тәтешле районында биш политик мәктәп, район үҙәгендә киске партия мәктәбе, партия тарихын өйрәнеү буйынса 3 түңәрәк эшләне. Бынан тыш Иосиф Виссарионович Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 28 түңәрәк ойошторолғайны. Быларға коммунистарҙан һәм партияһыҙ активтарҙан бөтәһе 400-ҙән артыҡ кеше йәлеп ителде.

Бульҡайпан, Иҫке Ҡайпан ауыл партия ойошмалары һәм Тельман исемендәге, «Коммунар», «Ялҡын» колхоздарының тәүге партия ойошмалары эргәһендә иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса ойошторолған түңәрәктәр эштәрен тамамланылар. Кәлтәй, Шулған, Асауды ауыл Советтарының партия ойошмалары эргәһендәге түңәрәктәрҙә һуңғы занятиеларен үткәрәләр.

Партия тарихын үҙ аллына өйрәнеүселәр өсөн төрлө темаларға докладтар, беседалар үткәрелде. Мәҫәлән, февраль, март айҙарында «Диалектик һәм тарихи материализм», «Коммунистар партияһының Манифесы», халыҡ-ара хәл тураһында докладтар һәм лекциялар булды.

ВКП(б) тарихын тәүге сығанаҡтарҙан өйрәнеүсе коммунистар менән «Коммунистар партияһының Манифесы» буйынса 60 кеше ҡатнашлығында теоретик конференция үткәрелде. Конференцияла ҙур әҙерлек менән 10-дан артыҡ кеше сығыш яһаны.

Х. Фазлыева.

Колхоз коммунистәре

Воскресен районы Молотов исемендәге колхоз партия ойошмаһы коммунистарҙы колхоз производствоһының хәл иткес участкаһына урынлаштырған. Партия члендары бригадирҙар, ферма мөдирҙәре, звено етәкселәре булып эшләйҙәр. Һәр артелдә ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу, колхоз королошоноң тейелмәҫ законы—артель Уставының боҙолоуға юл ҡуймау өсөн тура-тура көрәш алып баралар.

Хәҙер коммунистар яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән ҡаршылау өсөн бөтә көстәрен бирәп эшләйҙәр. Урожайҙың яҙмышын яҡшы сифатлы орлоҡ хәл итеүен тәрән аңлап, партия ойошмаһы орлоҡ туплау эшенең барышын айырыуса ныҡлы контроль аҫтына алды һәм ситтән һатып алыу, колхозсыларҙың үҙҙәренең шәхси запастарынан йыйнау юлы менән етерлек сәсеү орлоғо туплауҙы тәьмин итте.

Орлоҡ әҙерләү эше менән партия ойошмаһы секретаре иптәш Чуров, колхоз председателе менән берлектә, үҙе шөғөлләнде. Коммунист иптәш Субботин ауыл хужалығы машиналарының тулыһынса һәм яҡшы сифатлы итеп ремонтланыуын тәьмин итте. Коммунист иптәш Гордеевкә яҙғы сәсеүгә тартыу көстәрен әҙерләү бурысы йөкмәтелде. Ул бөтә эш аттарын, шулай уҡ эш үгеҙҙәрен яҡшы һәм уртаса көрлеккә еткереүгә өлгәште.

Н. Дауытов.

Парткабинет—партия уҡыуҙарының үҙәге

Раевка тимер юл станцияһы партия ойошмаһының парткабинете коммунистарҙың уҡыуҙарына ҙур ярҙам күрһәтә. Партия кабинете эргәһендә ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәге ойошторолған. Уға партия ойошмаһы секретаре иптәш Михайлов етәкселек итә. Түңәрәктә 13 кеше уҡый. Хәҙерге көндә улар «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсының» 11-се главаһын өйрәнәләр.

Иптәш Михайлов занятиеләргә ныҡлап әҙерләнә һәм идея яғынан юғары кимәлдә үткәрә. Ярҙам кәрәк булған уҡыусыларға консультациялар ойоштора. Шул уҡ ваҡытта ул уҡыусыларға ҡарата ла талапсан. Уларҙың үтелгән темаларҙы үҙләштереүҙәрен, төҙөгән конспекттарын тикшереп бара.

Парткабинет эргәһендә шулай уҡ политик мәктәп эшләп килә. Унда 24 кеше уҡый. Политик мәктәпкә парткабинет мөдире иптәш Маргачев етәкселек итә.

Парткабинет яҡшы йыһазландырылған, төрлө әҙәбиәткә бай, ул ысын мәғәнәһе менән коммунистарҙың һәм партияһыҙ активтарҙың уҡыуына ярҙам итеү үҙәге булып тора.

Х. Вафина.

Социалистик Хеҙмәт Геройы

Өлкән агроном Борис Титов

Арыш үҫә, тулҡынлана, емгә ултыра. Баҫыуҙарҙағы борғаланып киткән тар юлдарҙан барған аттарҙың дуғалары ла күренмәй.

Был ерҙәрҙе уңдырышлы булыу яғынан бик үк маҡтамай торғайнылар. Иң яҡшы килгән саҡтарҙа ла гектарҙан урожай 10—12 центнерҙан артманы. Ә быйыл — гектарына кәмендә 20-шәр центнер. Хәҙер инде шикләнергә урын юҡ. Ул йәйелеп ятҡан баҫыуҙарҙа, унан һуң ырҙындарҙа, келәттәрҙә булыр.

Гөрләп үҫкән ашлыҡтар — намыҫлы хеҙмәт емештәре. Ул бер йылдың ғына ла хеҙмәт һөҙөмтәһе түгел. Һабансылар, тырмасылар, сәсеүселәр, трактористар юғары һәм тотороҡло урожай үҫтереү өсөн ер эшкәртеүҙе йыл һайын яҡшырта барҙылар, агротехника талаптарын тулыраҡ ҡулландылар. Был баҫыуҙарҙа мул урожай үҫтереү өсөн көрәш фронтының алдынғы сафында һәр ваҡыт Базы МТС-ының өлкән агрономы Борис Иванович Титов булды. Ул кеше үҙенең ыҡҡанмаһы, күп йылдар буйына тупланған тәжрибәһен, совет агрономияһының өлгәшеүҙәрен колхоз производствоһында мөмкин тиклем киң ҡулланырға тырышты. Уның һәр ваҡыт колхоз баҫыуҙарында булыуын, колхозсылар менән юғары урожай үҫтереү тураһында һөйләшеүен, кәңәш итеүен, күрһәтмәләр биреүен әйтеп бөтөрөү ҡыйын.

Был урта буйлы, уйсан ҡарашлы, һәр ваҡытта һалмаҡ ҡына һөйләшеүсе кеше беренсе ҡарауҙа бер төрлө лә тәьҫир ҡалдырмаған шикелле, ләкин уның ниндәй бай тәбиғәтле икәнен белеү өсөн бер ниҫә сәғәт ваҡыт бергә булыу ҙа етә. Вильямс, Тимирязев, Лысенко хеҙмәттәрен белеү менән генә сикләнмәүсе... «Ашлыҡ үҫтереү ижади эш ул» тип әйтеүе һис тә тиккә түгел.

— Агроном өсөн, уҡыу йортон ғына тамамлау етмәй, — ти ул.— Ерҙең үҙендә бөтмәҫ белемдәр ята, баҫыуҙарҙан өйрәнергә кәрәк. Унда белем дә, матурлыҡ та бар.

1925 йылдан бирле инде Борис Иванович Титов йәшәүҙең ана шул матурлығын, хеҙмәттең көсөн баҫыуҙарҙа күрә. Новосибирск ауыл хужалығы техникумынан башланған тормош юлы Бөрө районы Базы МТС-ына килгәс тә еңел генә, киҫәкһеҙ генә булманы.

1941 йылдың яҙында сәселгән ашлыҡтар иҫ киткес булып уңдылар, ләкин ул ашлыҡтарҙы сәсеүселәрҙең күбеһе окопта ине инде. Башланған һуғыш колхоз баҫыуҙарынан ирҙәрҙе фронтҡа алды. Ә иген кәрәк. Ул хатта бик күп талҡырҙар артығыраҡ кәрәк ине. Гүмергә тракторға ултырмаған кешеләр тракторҙарға ултырҙылар. Сәсеүселәр, комбайнерҙар, оригалирҙәр, колхоз етәкселәре бөтәһе лә тәжрибәһе булмаған йәш, йәш кешеләр ине.

— Фронтҡа күберәк иген! — тине Тыуған ил һәм Борис Иванович быны бөтә тәрәнлеге менән аңланы, кешеләрҙе иген үҫтерергә тағы ла нығышмалыраҡ өйрәтте. МТС машиналары 30 колхозды хеҙмәтләндерә ине. Колхоздарҙың баҫыуҙары киң, унда бик күп кешеләр эшләйҙәр. Борис Иванович Титовҡа уларҙың барыһында ла булырға, уларҙың барыһын да өйрәтергә кәрәк. «Игенле ер үҙе үҫтермәй, — тине Борис Иванович уларға. — Ҡый үләндәре генә үҙҙәре үҫәләр...». Ауыр һуғыш йылдарында иген үҫтереү өлкән агроном өсөн ҙур мәктәп булды. Ул мәктәптә алынған белемдәр һуғыштан һуң башланған йылдарҙа ла ярҙам итте.

Һуғыш ваҡытындағы ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға һәләтле булған колхоздарҙан Тыуған ил тағы ла күберәк иген етештереүҙе талап итте, иген биреүҙе һуғышҡа тиклемге кимәлгә күтәрергә ҡушты. 1946 йылдың 1 майында МТС-тың бөтә 36 тракторы ла баҫыуҙарға сыҡты. Был һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың беренсе большевистик яҙы ине.

Өлкән агроном баҫыуҙарҙан ҡайтманы. Бураҙналарҙың тәрәнлеген дә, тырматыуҙың, сәсеүҙең сифатын да ҡараны.

— Брак, иптәш бригадир. Тәрәнлек 16 сантиметр ғына,—тине Титов, һөрөлгән ерҙәрҙең сифатын ҡарап. — Яңынан һөрөргә кәрәк.

Свердлов исемендәге колхоз баҫыуында 13 гектар, «Красноармеец» колхозында 2 гектар, «Сулпан» колхозында 11 гектар ерҙе ҡайтанан һөрөү кеүек ваҡиғалар күп кенә осраны.

Яҙғы баҫыу эштәре ваҡытында бөттө. Тракторҙар ҙа яҡшы эшләнеләр. Ләкин башланмаған эштәр күп ине әле. Өлкән агроном үҙенең участковой агрономдары менән колхоздарҙа иртә пар һөрөүҙе ойошторҙо. 20 июнь көндәренә ул тамамланып та өлгөрҙө. Ҡый үләндәре сыға башлағас, июль айында, пар ике ҡатланды. 2300 гектар ергә культивация үткәрелде. Август айҙарында инде бөтә колхоздарҙа ла арыш сәсеү тамамланғайны. Шулай итеп, киләсәк йыл урожайының ышаныслы нигеҙе һалынды.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары илебеҙҙең бөтә игенселәрен юғары урожай алырға саҡырҙы. Борис Иванович өсөн был саҡырыу айырыуса яуаплы ине. Ул күп беседалар үткәрҙе, ҡар тотоуҙың, ерҙе ашлау һәм башҡа сараларҙың ниндәй әһәмиәткә эйә булғанлығын бөтә колхозсыларға, механизаторҙарға киң һәм аңлайышлы итеп төшөндөрҙө.

Ҡарҙар иреп, ужымдар күтәрелә башлағас, колхозсылар Борис Ивановичтең кәңәшен тотоп, ужымдарҙы тырмата башланылар. Ҡайһы берәүҙәр ғәжәпләнеп аҡылланылар, ә күптәр өлкән агрономға ышандылар.

— Ул фән кешеһе, үҙе белеп тә, тәжрибәһе менән дә дөрөҫ эшләй, — тинеләр. Борис Иванович үҙ эшенең уңышлы буласағына ныҡ ышана ине.

Таулә былсыранып, ҡарайып ҡалған ужымдар терелеп баш күтәрҙеләр. Сайҡалып, тулҡынланып үҫтеләр. 1947 йылдың сентябрь айында бөтә колхоздарҙан Борис Ивановичҡа шатлыҡлы хәбәрҙәр килде. Улар юғары урожай алыуҙары тураһында һөйләйҙәр ине. Базы МТС-ы механизаторҙары хеҙмәтләндергән колхоздар 654 гектар майҙандың һәр гектарынан 21 центнер 12 килограмм арыш алдылар.

Партия һәм хөкүмәт Борис Ивановичтың намыҫлы хеҙмәтен ҙур баһаланы, уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

...Бына шундай уңған ҡулдар колхоз баҫыуҙарын алтынға мана. Ашлыҡтар тағы, тағы ла уңырҙар, Борис Иванович үҙ ғаҙәтенсә көн һайын тағы баҫыу юлдарын буйлап үтер һәм тулы башаҡтар, уны тәбрикләгән шикелле, хөрмәтләп, тулҡынлана-тулҡынлана баш ҡағырҙар.

Назар Нәжми.

Предприятиеләрҙә май алды ярышын киң йәйелдереү өсөн

Партияның күптән түгел булып үткән район, ҡала һәм өлкә конференциялары промышленносҡа партия етәкселеген яҡшыртыуҙы талап иттеләр һәм партия ойошмаларының иғтибарын эске резервтарҙы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, продукцияның үҙҙә тәннәү хаҡын кәметеүгә һәм сифатын күтәреүгә киң файҙаланыу кәрәклегенә юнәлттеләр.

Март айында күпселек промышленность предприятиеләре производство программаһын арттырып үтәнеләр. Нефть промышленносе работниктәре юғары темп менән эшләнеләр. Ләкин тимер юлдың насар эшләүе нефтселәрҙең ярыш йөкләмәләрен үтәүенә ныҡ комасаулыҡ итте.

Ҡышҡы айҙарҙа бораулау эшенең ҡыйынлығы еңелә бара. «Туймазинефть» тресының беренсе номерле бораулау конторһы һәм «Ишембайнефть» тресының бораулау конторһы квартал планын арттырып үтәнеләр. Ләкин «Башнефтеразведка» тресы һәм ҡайһы бер бораулау конторалары һаман да әле насар эшләйҙәр.

Тәҙелеп материалдары промышленносе предприятиеләре заводҙары «сезонсылыҡ» йоғонтоһын бөтөрөп, ҡышҡы шарттарҙағы ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, беренсе квартал планын арттырып үтәнеләр. Стәрлетамаҡ сода заводы ла алдынғы ... сафынан сыҡты. Әлки артта ҡалып килгән паровоз-вагон ремонтлау заводы март айы планын уңышлы үтәне. Был завод коллективында бөтә эшселәр тип әйтерлек социалистик ярыш менән солғап алынған һәм ярышыусыларҙың 70 проценте стахановсылар һәм ударниктар. Иң яҡшы стахановсыларҙан 91 кеше апрель башына биш йыллыҡ нормаһы үтәп, 1951—1952 йылдар иҫәбенә эшләй.

Заводтың партия ойошмаһы парггруппаларҙы нығытыуға һәм производство участкаларында уларҙың ролен күтәреүгә ныҡ иғтибар бирә. Һөҙөмтәлә бракты кәметеү, смена-көндәлек заданиене үтәү, коммунистарҙың авангардлығы өсөн көрәш парггруппаларҙың үҙәк бурысы булып әүерелгән. Партия ойошмаһының ярҙамында инженер-техник работниктар паровоз деталдарын эшкәртеүҙә юғары етештереүсәнлекле методтарҙы производствоға индерәләр. Параллелдарҙы тиҙлетелгән метод менән фрезерләү, уны эшкәртеүгә киткән ваҡытты 15—20 тапҡырға ҡыҫҡарта.

Ленинградлылар саҡырыуы буйынса республиканың күпселек предприятиеләре биш йыллыҡты дүрт йылда үтәргә йөкләмә алдылар. Был бик яуаплы йөкләмәне үтәүҙе ойоштороу — промышленность предприятиеләрендәге партия ойошмаларының, партия райкомдарының, горкомдарының һәм Обкомдың беренсе нәүбәттәге бурысы. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында республика промышленносеның планды үтәп еткермәүе, яуаплылыҡты тағы ла күтәрә.

Алған йөкләмәне үтәү өсөн йыл ярымдан күберәк ваҡыт ҡала. Хәҙерҙән үк, бер генә көндө лә үткәрмәйенсә, производство заданиеләрен һәр бер предприятие буйынса арттырып үтәүгә өлгәшергә кәрәк.

Иптәш Сталин әйткәнсә, хеҙмәтсәндәрҙең миллионлаған массаһының максималь активлеге социалистик тәҙелештең коммунистик методы булған социалистик ярыш биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көслө рычаг булып тора.

1947 йылдың планын срогынан алда үтәгән һәм ағымдағы йылдың беренсе кварталында ла юғары темп менән эшләгән Өфө промышленность предприятиеләренең уңыштарында ярыштың көсө айырыуса асыҡ күренә.

Бер йыл самаһы инде планды арттырып үтәп килеүсе Өфө агрегат заводы (директоры иптәш Советов, партия ойошмаһы секретаре иптәш Журавлев) республиканың иң яҡшы предприятиеләренән береһе. Партия-политик эштәрҙе хужалыҡ эше менән дөрөҫ ҡушып алып барыу һөҙөмтәһендә завод партия ойошмаһы эске резервтарҙы табыуға һәм оҫта файҙаланыуға коллективте ойоштора алды.

Эшләнгән ойоштороу-техник план продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙе, сифатын яҡшыртыуҙы, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе, хеҙмәттә күп талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыуҙы, эшселәрҙең квалификацияһын күтәреүҙе тәьмин итте. Яңы технологияны үҙләштереү бракты биш тапҡырға кәметергә мөмкинлек бирҙе.

Был заводтың коллективе май алды социалистик ярышының инициаторы булып, 1 майға тиклем биш айлыҡ планды үтәргә һәм пландан тыш 2 миллион һум накоплениа бирергә йөкләмә алды. Йөкләмә уңышлы үтәлә.

Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәргә тигән лозунг Советтар Союзының бөтә хеҙмәтсәндәре кеүек үк республикабыҙҙың бөтә промышленность һәм транспорт работниктәре өсөн дә боевой девиз булып әүерелде. Ошо лозунг аҫтында Беренсе майҙы достойно ҡаршылау өсөн ярыш киң ҡолас ала бара.

Ҡағиҙә буларак, бөтә предприятиеләр ҙә эшләп сығарыла торған продукцияның үҙенә төшөү хаҡын байтаҡ кәметеү һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү йөкләмәһен алдылар. Мәҫәлән, телефон аппаратуралары заводының коллективе беренсе майға апрель планын 115 процентҡа, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын дүрт айҙа 18, бракҡан килә торған юғалтыуҙарҙы 20 процентҡа кәметергә һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген, үткән йылға ҡарағанда, 28 процентҡа күтәрергә ҡарар итте. Заводтың күп стахановсылары тағы ла күтәренкерәк йөкләмәләр алдылар. Монтаж цехының стахановкаһы, март айында өс норма биреүсе иптәш Фәхретдинова апрель планын 400, кузнец Герасимов, электросварщик Искандаров һәм башҡа стахановсылар 300 процентҡа үтәргә булдылар.

Өфө тау оборудованиеләре, Белорет керос-сымбыҡ заводтарының һәм башҡа предприятиеләрҙең коллективтәре яҡшы экономик күрһәткестәргә ирешеү бурысын ҡуйҙылар.

Белорет металлургия заводының коллективе рентабеллелекте күтәреү өсөн көрәш йәйелдерҙе һәм 1948 йылда государство дотацияһыҙ 15 миллион һумға ҡыҫҡартыу йөкләмәһе алды. Белорет прокатсылары һәм домнасылары апрель айында пландан тыш йөҙҙәрсә тонна прокат, суйын биреү өсөн көрәшәләр.

Республикабыҙҙың промышленность предприятиеләрендә государственная дотация алмай эшләү, дотация суммаларын ҡыҫҡартыу, рентабеллелекте бөтә яҡлап күтәреү өсөн хәрәкәт көндән-көн киң ҡолас ала бара.

Тимер юл һәм йылға транспорты работниктәре лә социалистик ярышҡа ҙур күтәренкелек менән ҡушылдылар. Алдынғы тимер юлсылар поездарҙы график буйынса йөрөтөү, вагондар әйләнештәрен тиҙләтеү, ағыулыҡҡа экономия яһау һәм пассажирҙарҙы яҡшыраҡ хеҙмәтләндереү өсөн тырышып эшләйҙәр. Ләкин Өфө бүлексәһе, тотошо менән алғанда, ҡәнәғәтләнерлек эшләмәй әле, государство заданиеләрен тулыһынса үтәүҙе башҡарып сыҡмай.

Республиканың тимер юлсылары артта ҡалыусылыҡты бөтөрергә, нефтселәргә социалистик йөкләмәләрен уңышлы үтәү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырырға тейештәр.

Яҡын көндәр эсендә навигация башланасаҡ. Йылғасылар навигацияның тәүге көндәренән үк йөк йөрөтөүҙең юғары темпын тәьмин итергә бурыслылар. Бигерәк тә көҙгә-ҡышҡы осорҙа әҙерләнгән ағастарҙы йылғалар буйынан промышленность предприятиеләренә максималь ҡыҫҡа срокта оҙатыуҙа йылғасыларға яуаплы бурыстар йөкмәтелә. Хәҙер инде пароходство работниктәренең урман промышленносе работниктәре менән бергә тығыҙ бәйләнештә эшләүҙәре тәьмин ителгән булырға тейеш.

Урман промышленносе Министерствоһының работниктәренән, партия һәм совет органдарынан урындарҙа ағас әҙерләү ойошмаларына ағастарҙы һаллауҙы йылдам тамамлау өсөн ҙур ярҙам күрһәтеүҙәре талап ителә.

Промышленность предприятиеләре һәм транспорт работниктәре Беренсе Май байрамын достойно рәүештә билдәләү өсөн предприятиеләрҙең юғары темпта эшләүҙәрен тәьмин итеү менән бергә, үҙ предприятиеләрен культуралы тәртипкә индерергә тейештәр. Производство биналарын һәм завод территорияһын сүп-сарҙан, төрлө былсыраҡлыҡтан таҙартырға, столовыйҙарҙа, магазиндарҙа һәм торлаҡ йорттарында санитар торошто яҡшыртырға кәрәк.

Партия ойошмалары социалистик ярышты киң йәйелдереүгә, уға бөтә хеҙмәтсәндәрҙе лә ылыҡтырыуға ҙур иғтибар бирергә тейештәр. Алдынғы стахановсыларҙың уңыштарын киң популярлаштырырға, участкаларҙың, бригадаларҙың, цехтарҙың берҙәм эшләүҙәренә өлгәшергә кәрәк.

Май алды ярышы республикабыҙҙың промышленность предприятиеләрендә яңы производство уңыштарын тәьмин итергә һәм 1948 йылдың производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн ныҡлы нигеҙ һалырға тейеш.

Май алды социалистик ярышын киң рәүештә йәйелдереп, хеҙмәтсәндәребеҙ Беренсе Май байрамын производствола яңы еңеүҙәр менән билдәләйәсәк.

В. Должных,

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты секретаре.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

АҠШ президенты посына Эйзенхауэр кандидатураһын күрһәтеү тураһында „Република" газетаһы

РИМ, 10 апрель. (ТАСС). «Република» газетаһының Вашингтондан алынған мәҡәләһендә, ҡайһы бер белеүсе журналистар кругтарына һылтанып, демократик партияның уң ҡанатының президентлыҡҡа кандидат итеп күрһәтелгән Эйзенхауэр файҙаһына яһаған яңы бороло АҠШ-тың етәксе империалистик группаларының Америка политикаһының уңышһыҙлыҡҡа осрауы өсөн яуаплылыҡты Трумэндең үҙенә йөкмәтергә һәм президентлыҡҡа финанс кругтарының башҡа кандидатын көсләп тағырға һәм шуның менән АҠШ политикаһының элекке агрессив курсының дауам итеүен тәьмин итергә маташыуҙары тураһында һөйләй, тип хәбәр итә.

Был «боролоштоң» сәбәптәре, бер яҡтан, илдә эске политик һәм экономик ҡыйынлыҡтар айҡанлы демократик партияның популярлығының кәмеүе, икенсе яҡтан, сит илдәр алдында Американың авторитетының төшөүе һәм эске оппозицияның көсәйеүе менән аңлатыла.

АҠШ-тың эшлекле, политик һәм финанс кругтарының вәкилдәре, илдә тынысһыҙлыҡ атмосфераһын артыҡ ҡуҙғытырға саҡырып, экспансияның хәҙерге политикаһына һәм хәрби авантюраларға ҡаршы асыҡтан-асыҡ һөйләйҙәр. Ошо ҡаршылыҡты күрә тороп, етәксе финанс һәм хәрби кругтар, хәрби промышленностең әлегә тиклем ишетелмәгән табыштарын тәьмин итеүсе хәҙерге политиканан баш тартырға теләмәйенсә, уңышһыҙлыҡ өсөн булған бөтә яуаплылыҡты әле йәшәй торған хөкүмәткә аударырға маташалар һәм Трумэн урынына Эйзенхауэрҙы ҡуйырға әҙер торалар. Эйзенхауэр уң демократтар һәм республиканецтар президент посына күрһәтелгән кандидатҡа ҡуйған бөтә талаптарға яуап бирә: бынан тыш, партиянан тыш булған хәлендә, ул Американың һуңғы политикаһының уңышһыҙлыҡҡа осрауы өсөн яуаплы булып тормай.

Үҙенең хәрби даны арҡаһында һәм политиканан алыҫ тороусы һәм шәхси тормошҡа китеүсе кеше булыуына ҡарамаҫтан, Эйзенхауэр, тип дауам итә газета, һуғыш хәрәкәттәренең барышы өҫтөнән инглиздәрҙең тулы контролен тәьмин итеп, союзный главнокомандующий посына Черчилль тарафынан ҡуйылды ғына, ә уның реакцион политик ҡараштары әле һуғыш барышында уҡ күп тапҡырҙар беленде: ул Дарланды һәм Петэндең төньяҡ Африкалағы вәкилдәрен яҡланы, Италияла фашистик режим ҡалдыҡтарына һәм монархистик милитаристик кругтарға таяныу һәм Муссолиниҙы бәреп төшөрөү айҡанлы яһаған үҙенең белдереүендә был эштәге бөтә хеҙмәттәр барыһы тик Савой династияһыныҡы, тип белдерҙе. Хәҙер Эйзенхауэр милитаристик Форрестол-Леги кликаһында тора. Был клика хәрби баҫым яһау саралары менән Европа илдәренә политик һәм экономик баҫымды тулыландырыу яғында тора.

Эйзенхауэрҙың властҡа килеүенең Америка халҡына һәм башҡа илдәр халыҡтарына бер ниндәй ҙә яҡшылыҡ бирмәйәсәгендә һис бер төрлө шик юҡ, тип һөҙөмтәләй «Република» газетаһы.

АҠШ-та һайлауҙар алдынан

Уоллес хәрәкәтенә ҡаршы реакцион кампания

НЬЮ-ЙОРК, 10 апрель. (ТАСС). Прогрессив общиналар һәм бер нисә газета 6 апрелдә Эвансвиллдә (Индиана штаты) Уоллес яҡлы кешеләр митингыһына хулигандарҙың һөжүм итеүенә ҡаршы ҡеҫкә рәүештә протест белдергән ваҡытта, Индиана штатының батырланған реакцион элементтәре Уоллесҡа ҡаршы үҙҙәренең провокацияларын дауам итәләр.

Хәбәрселәрҙең Индианаполистан хәбәр итеүҙәре түбәндәгеләр тураһында һөйләй: күрәһең 7 апрелдә Уоллес Индианаполистә 3500 кеше алдында сығыш яһағанда полиция көслә һаҡлы ғына Эвансвилл көслауҙың ҡабатланыуын иҫәпкә алған.

«Нью-Йорк пост» һәм «Дейли уоркер» газеталары хәбәрселәренең Индианаполистан хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, Индианаполис матбуғаты Эвансвиллдәге тәртипһеҙлектәр тураһындағы фотоларҙы, шулай уҡ Эвансвиллдең «Уоллесты президент итеп һайлау өсөн милли комитет» председателе Болдуинға һәм ҡайһы бер башҡа кешеләргә һөжүм итеүсе реакционерҙарҙың провокацион белдереүҙәрен иң күренекле урындарҙа урынлаштырған.

Уоллесҡа һәм милли комитет етәкселәренә Индианаполиста хулигандар һөжүм итмәһәләр ҙә, Индианаполистағы бөтә отелдәрҙең уға пресс-конференция үткәреү һәм ҡабул итеүҙәр өсөн бина бирмәүҙәре менән Уоллесҡа ҡарата кәмһетеү яһалды. Отелдәрҙең управляющийҙары матбуғат өсөн яһаған белдереүҙәрендә, Америка легионы вәкилдәре Уоллесҡа бина бирһәк отелдәргә һаҫыҡ еҫ сығарыусы бомбалар ташлау менән ҡурҡыттылар. Шулай итеп, Уоллес негр докторының квартираһында туҡталырға мәжбүр булды, бында ул пресс-конференция яһаны һәм профсоюздар вәкилдәрен, университет профессорҙарын һәм башҡаларҙы ла индереп, үҙе яҡлы булған урындағы кешеләр менән кәңәшмә үткәрҙе. Уоллес был пресс-конференция ваҡытында Трумэнде уның Уоллесҡа ҡаршы булған шәхси сығыштарының, «ҡайһы бер аҡылһыҙ кешеләрҙең һәм фанатиктарҙың характерҙарын» килтереп тыуҙырыуы өсөн ғәйепләне. Ләкин Уоллес, үҙен яҡлаусы көстәрҙең уны провокацияларға юл ҡуймаясаҡтарын һәм Америка халҡы алдында тороусы төп политик мәсьәләләргә таяныуҙарын дауам итәсәктәре тураһында белдерҙе.

Уоллес Индианаполиска килер алдынан Индиана штатының «милли гвардияһы» етәксеһе Максвелл, әгәр ҙә билдәләнгән митингыла билдәле негр йырсыһы Поль Робсон һәм Индианаполистең бер нисә билдәле негры сығыш яһаясаҡ булһалар, был митингыны ҡыуасағы тураһында белдергән. Ләкин көслө протестар Максвеллды үҙенең ҡурҡытыуҙарын үтәүҙән баш тартырға мәжбүр иттеләр һәм митинг билдәләнгән ваҡытта үткәрелде.

Американың эшселәр партияһы Нью-Йорктағы матбуғат өсөн яһаған белдереүендә Эвансвилл хулигандарының Уоллес сотрудниктарына һөжүм итеүен ғәйепләне һәм «Уоллес хәрәкәтенең үҫеүе менән тынысһыҙланыусы реакцияның ике партияһының көсө, күрәһең, һайлауҙарҙы йөҙрөҡтәр менән, ә һайлау бюллетендәрен таяҡтар менән алыштырырға ҡарар иттеләр», тип белдерҙеләр. Әгәр ҙә политик йыйылыштарҙы таратырға мөмкин икән, һайлауҙар көнендә һайлау участкаларының штурмовиктар тарафынан баҫып алыныуҙары ихтимал», тип белдерҙеләр.

Нью-Йорктағы «Америка һуғыш ветерандары комитеты» шулай уҡ «Эвансвиллдәге һуғыш ветерандарының асыу тыуҙырғыс хәрәкәттәрен» ғәйепләне һәм «демократия өсөн көрәшеүсе һуғыш ветерандары демократияға һөжүм итергә теләйҙәр һәм Уоллестең йөрөү өсөн әһәмиәтле мәсьәләләр буйынса сығыш яһау хоҡуҡын яҡларға тейештәр» тип күрһәтә.

КПП-ға (Производство профсоюздары конгресы) хеҙмәткәрҙәр профсоюзы председателе Даркин матбуғат вәкилдәренә, Эвансвиллдәге һөжүм, «өсөнсө партия хәрәкәтен быуыу өсөн реакционерҙарҙың ниҫек тырышҡанлыҡтарын» күрһәтә, тип белдерҙе.

КПП-ға инеүсе аяҡ кейемдәре промышленносе эшселәренең һәм йыһаздар эшләүсе эшселәрҙең профсоюздары вәкилдәре, был һөжүм гитлерсе штурмовиктарҙың хәрәкәттәрен хәтергә төшөрә, тип иҫәпләйҙәр.

Хатта «ПМ» газетаһының ғәҙәттә Уоллесҡа ҡаршы сығыш яһаусы хәбәрсеһе Лернер ҙә үҙенең редакцион мәҡәләһендә, Эвансвилл хулигандарын ҡотортоусы көстәр «беҙҙең илебеҙ һәм уның азатлығы өсөн реаль ҡурҡыныс» булып торалар, тип яҙҙы.

Колумбиялағы хәлгә ҡарата

НЬЮ-ЙОРК, 12 апрель. (ТАСС). Ассошиэйтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Вашингтондан хәбәр итеүенә ҡарағанда, АҠШ государство департаменты кисә матбуғат вәкилдәренә Америка хәбәрселәренең Боготанан биргән «ебәрелгән күп кенә хәбәрҙәрен тапшырған. Был хәбәрҙәрҙә, Колумбияның яңынан төҙөлгән коалицион хөкүмәтенең кисә бөтә илдә һуғыш хәлендә тип иғлан иткәнлеге тураһында әйтелә.

Юнайтед Пресс агентствоһының хәбәрсеһе, либераль партия лидеры — эске эштәр министры Дарио Эчандия етәкселегендәге яңы коалицион хөкүмәт 6 либералдан, 6 консерваторҙан һәм хәрби министр тарафынан билдәләнгән генерал-лейтенант Оламподан тора, тип хәбәр итә.

Эпернэ ҡалаһының муниципаль советына һайлауҙарҙа Франция коммунистарының еңеүе

ПАРИЖ, 12 апрель. (ТАСС). Франция коммунистары Эпернэ ҡалаһының муниципаль советына һайлауҙарҙа яңы еңеүгә өлгәштеләр.

Һайлауҙар, РПФ (де Голль партияһы) һәм МРП («милли-республикан хәрәкәт» — католиктарға яҡын партия, Бидо уның лидерҙарының береһе булып тора) членттарынан торған советниктар отставкаға сыҡҡандан һуң таратылған муниципаль советтың составын яңыртыу кәрәклеге менән килеп тыуҙы. Был һайлауҙар үҙенә күрә өлгөлө һайлауҙар итеп ҡаралдылар.

Һайлауҙарҙа һайлаусыларҙың 84 проценты ҡатнашты. Коммунистар 3.757 тауыш (10 урын); РПФ — 2.442 тауыш (7 урын); МРП — 2.143 тауыш (6 урын); социалистик партия — 901 тауыш (2 урын); «Һул республиканецтар берләшмәһе» — 706 тауыш (2 урын) алды.

1947 йылдың октябрендә тауыш биреүселәр һаны шул тиклем үк булған саҡта коммунистар 9 урын, РПФ — 9 урын, МРП — 6 урын, социалистик партия — 3 урын алғайны.

Румынияның бөйөк милли собраниеһендә

БӨЙӨК МИЛЛИ СОБРАНИЕ ПРЕЗИДИУМЫ ҺАЙЛАУ ҺӘМ ЯҢЫ ХӨКҮМӘТ ТӨҘӨҮ

БУХАРЕСТ, 13 апрель. (ТАСС). Бөйөк милли собраниеның бөгөнгө киске ултырышы депутаттарҙың ант биреүҙәре менән башланды.

Көслө алҡыштар аҫтында Румыния халыҡ республикаһының бөйөк милли собраниеһе президиумы һайланды.

Бөйөк милли собрание президиумының яңы һайланған члендаре ант биреп бөткәс, премьер-министр доктор Петру Гроза президиумға хөкүмәттең отставкаға сығыуы тураһында белдерҙе. Президиум хөкүмәттең отставкаға сығыуын раҫланы. Бөйөк милли собрание президиумы председателе академик Пархондың тәҡдиме буйынса яңы хөкүмәт төҙөлдө. Хөкүмәттең составы түбәндәгеса: министрҙар советы председателе — доктор Петру Гроза, беренсе вице-председатель Георгиу-Деж, икенсе вице-председатель Траян Савулеску, өсөнсө вице-председатель — Штефан Войтек, сит ил эштәре министры — Анна Паукер, эске эштәр министры — Теохари Джорджеску, финанс министры — Василе Лука һәм башҡалар.

Хөкүмәттең беренсе вице-председателе Георгиу-Деж бер үк ваҡытта юғары экономик совет председателе һәм аҡса баҫтырыу һәм стабилизация буйынса комиссия председателе вазифаһын үтәй. Ул экономика һәм финанс эштәре менән етәкселек итеүсе министерстволарҙың эшен үҙәкләштерә.

КИНО

„Себер ере тураһында хикәйәт"

Фильмдең сюжетын бер нисә һүҙ менән һөйләп бирергә мөмкин. Старший лейтенант Андрей Балашов (артист В. Дружников) фронттан Мәскәүгә ҡайта. [illegible] Наташа Малинина (артистка М. Ладынина) [illegible]

[illegible] Оленич менән инсеһенең араһында булған бәхетһеҙ һүҙ Заполярьеға китә һәм унда «Себер ере тураһында хикәйәт» тигән симфоник оратория яҙа. Был оратория ҙур уңышлыҡ менән автордың ҡатнашлығында Мәскәүҙә башҡарыла.

Һуңынан Андрей, Наташа менән (ул инде хәҙер уның ҡатыны) Себергә, үҙенең эшен дауам итергә китә.

Тимәк, Андрей Балашовты — совет кешеләрен, шундай гена бәхетһеҙлектәр ҙә алға үҫештән туҡтатып ҡала алмай.

Үҙ иленең патриоты, совет гражданы Балашов общественала үҙенең яңы урынын таба һәм уға файҙалы булыуҙы маҡсат итеп ҡуя һәм уны үтәй.

Бай рухлы совет кешеләрен, бигерәк тә массаны күрһәтеү менән бергә фильм Тыуған илдең киңлеген, уның иң киткес матурлығын, [illegible] алдына килтереп баҫтыра.

Фильмдең тәү баштағы кадрҙарынан — Бреслау ҡалаһының подвалында уйнаған һалдаттар-сибиряктарҙың йырында, ҡараштарында совет халҡының, Тыуған илдең һуғышын күрһәтә. Был бигерәк матур күренеш, һәр һалдаттың үҙенә характерлы черталары, позалары бар, улар һәр береһе үҙ урынында.

Һуңыраҡ килеп, Себер йылғаһы буйлап йөҙгән баржала Балашовтың йырын тыңлаусыларҙың яҡты йөҙҙәре, уларҙың ябайлыҡтары шулай уҡ һәм йөрәккә бигерәк яҡын; [illegible] тауҙарҙың матурлығы, күҙ ҡарашы [illegible] алмаҫлыҡ киңлектәр, урмандар [illegible] илебеҙҙең бай булыуы тураһында тағы һөйләйҙәр. Был картиналарҙы биреүҙә режиссер И. Пырьевтың ҙур оҫта булғанлығын, кино искусствоһы [illegible] бөтә мөмкинлектәрен файҙалана белеүе тураһында аңлата.

Төп персонаждарҙан башҡа, шулай уҡ шофер Яков Бурмак (артист Б. Андреев) көйәк темпераментлы, асыҡ йөрәкле, [illegible] күңелле, үткер һүҙле һәм Настенька Гусенкова (артистка В. Васильева) [illegible] ябай образдар ҙа. Яков Бурмак һәм Настенька араһындағы көйәк мөнәсәбәттәр тормошта һәр [illegible] осрайҙар һәм фильмда ул [illegible] итеп бирелгән! Быны мөхәббәт һәм дуҫлыҡ тураһында йыр тип әйтергә мөмкин.

Фильмде ҡарағанда тулҡынланаһың да, [illegible] да, көләһең дә. [illegible] һәр әйтелгән һүҙ, артистарҙың уйнауҙары тамашасыларҙы [illegible] йөрөтергә мәжбүр итәләр.

«Себер ере тураһында хикәйәт» фильмен тыуҙырыусыларға күптән түгел Сталин премияһы лауреаттары исеме бирелде. Был, һис шикһеҙ, [illegible] булып тора. Сценаристар П. Помещиков, Н. Рожков [illegible] башлап, [illegible] артист хеҙмәте [illegible] фильмдең дөйөм матурлығына хеҙмәт итә.

Был совет халҡының бәхете, хеҙмәт подвигтарын һәм Тыуған илебеҙҙең сикһеҙ байлығын, матурлығын [illegible] күрһәткән һәйбәт, төслө фильм һәм уны ҡарағанда һин: «Ғүмерҙән дә матур нәмә бар?!» тип әйтәһе килә.

Н. Бүләков.

Тәнҡит һәм библиография

Тулы тауышҡа йырланмаған йырҙар*)

Сәләх Кулибайҙың «Яуҙағы йыр» тигән йыйынтығы Совет Армияһы һалдатының һуғышта, ут дауылы аҫтында кисергән кисерештәрен, уй һәм хистәрен, донъяға һәм киләсәккә ҡараштарын бирергә маҡсат итеп ҡуйған. Йыйынтыҡҡа, 1941—1945 йылдарҙа яҙылған, бөтәһе егерме шиғыр, бер поэма индерелгән. Улар араһында байтаҡ тәрән йөкмәткеле, йәштәрҙе патриотизм рухында, Ленин—Сталин партияһы эшенә сикһеҙ бирелгәнлек рухында тәрбиәләрлек шиғырҙар байтаҡ ҡына. Йыйынтыҡ — халыҡтар дуҫлығына, бөйөк рус халҡына бағышланған — «Бөйөк дуҫ тураһында» тигән поэма менән башлана. Рус халҡына, уның батыр улдарына, бөйөк большевиктар партияһына һәм уның етәкселәре Ленинға, Сталинға шағир үҙенең иң ҡайнар мөхәббәтен, иң йылы хисен бағышлай.

Рәсәй! Рәсәй хайран киңлегең,
Ҡояш нуры етмәҫ ерең бар,
Барса нурҙарыңды бирерлек
Ҙур ҡояшлы Кремлең бар.

Ошо киң ер Ватан атала
Төрлө халыҡтарҙың телендә,
Һәр беренә уртаҡ ата бар —
Эше менән оҡшаш Ленинға.
(«Байраҡ»).

Совет халҡы Бөйөк Ватан һуғышының уты эсендә ана шул «ҡояш нуры етмәҫ киң ерең» һәр бер аҙымын яҡлап йөрөп, ғүмерен аямай һуғышты.

Тарихта тиңе булмаған был һуғышта ул донъяны хайран ҡалдырырлыҡ батырлыҡтар күрһәтте. Уның «Гастеллолары дошман башы өҫтөнә» снаряд булып ташландылар. Матросовтары үҙ күкрәктәре менән дошман амбразураһын ҡаплап, «фашист пулялары быуып торҙо»лар. Шағир үҙенең поэмаһында ана шул мәңге үлмәҫ батырҙарҙан йырлай.

Азатлыҡ өсөн көрәштең бөтә тарихында бөйөк рус халҡы етәксе булғанлығын, батша Рәсәйенең иң ҡараңғы йылдарында ла рус халҡы яҡты киләсәк өсөн көрәшкә рухландырыуын күрһәтеп, шағир былай ти:

Төндәр үттек
Эйе, ҡара төндәр.
Яҡты телгән саҡта рухыбыҙ:
Горький Данкоһындай
Үҙ йөрәген
Сырлаҡ итеп барҙы русыбыҙ.
(«Бөйөк дуҫ тураһында»).

Социалистик Тыуған илебеҙҙе немец-фашист илбаҫарҙарҙан азат итеү өсөн барған Бөйөк Ватан һуғышында совет халҡы Лениндең, Сталиндең еңелмәҫ байрағы аҫтына тағы ла нығыраҡ тупландылар, еңеүгә ҡәҙәр шул байраҡтан таптылар һәм шул байраҡ аҫтында аҡылан яңы еңеүҙәргә өлгәштеләр:

Ленин һәм Сталин байрағынан
Күрҙек еңеү көнө яҡтыһын.
Тауҙар, һыуҙар аша алып үттек
Ул байраҡтың керһеҙ хаҡлығын.
(«Бөйөк дуҫ тураһында»).

Һәм был һуғыштың етәксе көсө бөйөк рус халҡы булды. Ул «күп милләтле халыҡ эсендә өлкән ағай йәки атай булып башлап барҙы». Большевиктар партияһының «аумаҫ байрағын тотоп, өлкән һуғышҡа — Ватан һуғышына күтәрелде», Советтар Союзының бөтә халыҡтарын үҙ тирәһенә тупланы һәм, шулай итеп, халыҡтар дуҫлығы тағы ла көсәйҙе, ҡаҡшамаҫ көс булып әүерелде.

Йыйынтыҡҡа индерелгән «Байраҡ», «Ҡарт партизан», «Ант», «Карпат ауылында», «Хөкөм алдында», «Дауа» тигән шиғырҙарҙы ла йөкмәткеһе һәм шиғри яғынан байтаҡ уҡ уңышлыларҙан һанарға кәрәк.

Үкенескә ҡаршы, йыйынтыҡҡа ингән бөтә шиғырҙар ҙа юғарыла күрһәткәндәр кеүек уңышлы сыҡмағандар. Ҡайһы берҙәре идея яғынан асыҡ түгел һәм, бигерәк тә, шиғыр булыу яғынан эшләнеп бөтмәгәндәр. Шағирҙең үҙе менән әйткәндә, «һанһыҙ ваҡиғаларҙың аҙын бөтмәгән биттәре» булыуҙан уҙмағандар һәм уларҙы «ғүҙәл шиғыр» итеү шағирҙең «хыялында ниғәҙ төшө» кенә булып ҡалған. Мәҫәлән, «Йоҡоһоҙ төн», «Һөжүм мале», «Өлә көҙ» тигән шиғырында шағирҙың нәмә әйтергә, нәмәне күңелдәрергә теләүен аңлауы ҡыйын. Ғөмүмән улар шиғыр булыуҙан бигерәк, ябай хәбәрҙе хәтерләтеп торалар. Поэзия, әҙәбиәттең ауыр жанры булараҡ, күп көс һалыуҙы, һүҙ ниһилларын бик уйлап, урынлы ҡулланыуҙы талап итә. Атаҡлы рус тәнҡитсеһе В. Г. Белинский поэзияны «искусствоның иң юғары заты» тип атаны. Искусствоның был юғары затын һайлап алған кеше үҙ ижадына ана шундай ҙур талап ҡуйырға тейеш.

Шуның менән бәйләнештә шағирҙең теленә лә туҡталып үтеү кәрәк булыр. Сәләх Кулибайҙың шиғырҙарында осраҡлы һүҙҙәр йәки бөтөнләй икенсе төшөнсәне аңлата торған һүҙҙәр байтаҡ осрайҙар. Мәҫәлән, ул һуғышты ни өсөндәр «ғауға» тип ала. (...«Ғауға баҫты ер өҫтөн», «Илдең өҫтө ғауға күтәрҙе», «Ҡара көйөп көйәк ғауғалар»). Әҙәбиәттә ҡабул ителәнсә «Ғауға» һүҙе, талаш, скандал төшөнсәһен бирә. Һүҙҙе дөрөҫ ҡулланмау арҡаһында Бөйөк Ватан һуғышы кеүек тарихи ҙур ваҡиғаны күрһәтергә теләп яҙылған тотош строфа кәрәкле мәғәнәне бирмәй. Мәҫәлән:

Булды көндәр, иптәш,
Хәтерҙә бик.
Илдең өҫтө ғауға күтәрҙе.
Илде беҙ ғауғаны йыртҡыстарҙың
Ерҙәренә күптән күсерҙек.
(«Һөжүм алдынан»).

Юғарыла ҡайһы бер шиғырҙарҙың ябай хәбәрҙән алдын тормағаны тураһында әйтелгәйне. Миҫал өсөн «Һөжүм мале» тигән шиғырҙы алайыҡ, ул шиғырҙа ошондай юлдарҙы һәм строфаларҙы күреп була:

Һыулауына асыу һыуҙа таҡам:
Бутҡа майлы, шундай ҡуйы сүп.

Йәки:

Ваҡытлы һәм тәмле обедтән һуң
Ҡап уйнаны тағы йөҙҙәрҙә,
Башта һүктек,
Унан хуплап
Хаҡлы булдыҡ уны һөйәргә.

Хатта үҙенең идеяһы менән бик әһәмиәтле булған «Бөйөк дуҫ тураһында» тигән поэмала ла тел ҡытыршылыҡтары тулып ята. Бында уларҙың бер нисәһен генә күрһәтһәң дә етә: «йәки һуғыштарҙа дошман өҫтөн штыҡ менән һиһа ташлаһа»; дошман «ҡул күтәрҙе йыртҡыс төҫ менән»; «Ерерҙә лә, ерға уяндырҙы байраҡ менән азат таңдарын», «рустың бөйөк уңдай уяны» һәм башҡалар. Түҫге килтерелгән һөйләмдә шағир дошмандың өҫтөнлөгөн, әллә өҫтөн көс менән ташланыуын әйтергә теләйме, аңлашылмай. Икенсе миҫалдағы «йыртҡыс төҫ менән» тигән һүҙ уңышлы түгел. «...Ерға уяндырҙы...» тип түгел «Ерҙә уяндырҙы», тип яҙылырға, ә һуңғыһы «Рустың уңдай бөйөк уяныдай» тип яҙылырға тейешле ине. Унан ары:

Был дуҫлыҡты еңерә алмаһылар,
Булып үткән хандар, батшалар.

тигән юлдар рифманы тура килтереү өсөн генә, мәғәнәһен уйлап тормай яҙылғандар. Бынан: тәүҙә халыҡтарҙың хәҙергесә дуҫлығы булғанда ла унан хандар, батшалар булып үткәндәр һымаҡ аңлашыла. Ысынында иһә халыҡтар дуҫлығы ана шул хандарға, батшаларға, бөтә төр эксплоататорҙарға ҡаршы ҡаты көрәштә барлыҡҡа килде, үҫте һәм сынықты, совет иленең, еңгән социализм иленең ҡаҡшамаҫ көсөнә әүерелде.

Ошондай һәм ошоға оҡшашлы башҡа күп кенә тел ҡытыршылыҡтары йыйынтыҡҡа ингән шиғырҙарҙың сифатын түбәнәйтәләр, шиғырҙың яңғырауыҡлылығын юғалталар, шағирҙең тауышын быуалар. Тел — яҙыусы өсөн иң төп нәмә. Яҙыусы телгә айырата ныҡ иғтибар бирергә тейеш. Совет яҙыусыларының бөйөк оҫтаҙы А. М. Горький: «әҙәби эштең техникаһы — бөтәһенән дә элек тел өйрәнеүгә ҡайтып ҡала... Телдең көс булып тәьҫир итеүсе мысы матурлығы китаптың һүрәттәрен, характерҙарын, идеяларын формалаштырыусы һүҙҙәрҙең аныҡлығы, асыҡлығы һәм яңғырауыҡлылығы менән тыуҙырыла» тип өйрәтте.

Китаптың редакторы Әхнәф Харис исемле шағир Сәләх Кулибайға ҡарата ныҡлы талапсанлыҡ күрһәтмәгән, шуның арҡаһында эшләнеп бөтмәгән шиғырҙарҙың баҫылып сығыуына юл ҡуйғанлығын һәм шуның менән С. Кулибайға зарар ярҙам күрһәткәнлеген дә әйтеп үтеү урынлы.

Ғ. Зәйҡорнеев.

*) Сәләх Кулибай. «Яуҙағы йыр», шиғырҙар йыйынтығы. Башгосиздат, 1947 йыл.

ТӨҘӘТЕҮ

Иптәш И. В. Сталиндең газетабыҙҙың 14 апрель номерендә баҫып сығарылған телмәрендә дүртенсе абзацтың башында «Беҙ быны ошо залда ҡатнашыусылар ғына түгел, бәлки Финляндияның булһын, шулай уҡ Советтар Союзының ошо залдан тыштағы бөтә кешеләренең дә яҡшы аңлауын теләйбеҙ», тигән һүҙҙәр «Быны ошо залда ҡатнашыусылар ғына түгел, бәлки Финляндияның булһын, шулай уҡ Советтар Союзының ошо залдан тыштағы бөтә кешеләренең дә яҡшы аңлауҙары кәрәк», тип уҡырға.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт опера һәм балет театрында — «БАТША ҠӘЛӘШЕ». Киске 8 сәғәттә башлана.

Рус драма театрында — «ТАРТЮФ». Кис 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта» — «ЧАПАЕВ».

Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСТА УҠЫУСЫ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-83-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26.

П00123 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
1948 йыл № 77
17 апрель шәмбе
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).
1948 йылдың I кварталында РСФСР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство планын үтәү йомғаҡтары тураһында РСФСР статистика управлениеһенең белдереүе. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. А. М. Климовцева. — Беҙҙең беренсе өлгәшеүҙәребеҙ. А. Байков. — Политик мәктәптәрҙең эшен уңышлы тамамларға. (2-се бит).
Беҙҙең республикала. (2-се бит).
Тауге мөмкинлектәр тыуыулы менән баҫыу эштәрен башларға! И. Абдуллин. — Иптәш Мәхмүтов етәкселек иткән звенола. А. Солтанов. — Звенолар бар, эштәре юҡ. Ю. Усманов. — Ужымдарҙы ашлағанда урындағы шарттарҙан сығып эш итергә. (3-се бит).
С. З. Мак. — Комбинат проект көйәтен тиҙләштерергә тейеш. (3-се бит).
СССР менән Италия араһында сауҙа һөйләшеүҙәре тураһында мәсьәлә хаҡында. (4-се бит).
СССР прокуратураһында. (4-се бит).
Ғәйнан Әмири. — Совет халҡының бөйөк ырыҫы. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Промышленность һәм транспорттың эш темптарын ҡырҡа көсәйтергә

Республика промышленносе һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылының икенсе кварталына инде. Үткән беренсе кварталда, 1947 йылдың шул уҡ осорона сағыштырғанда, производство темптары байтаҡ күтәрелде. Йөҙҙән артыҡ предприятие квартал планын үтәне һәм арттырып үтәне.

Нефть эшкәртеү предприятиелары планды уңышлы үтәп, государствоға пландан тыш миллиондарса һум файҙа бирҙеләр. Ҡалалар араһында, үткән йылдағы кеүек үк, Өфө промышленносе алдынғы сафта барҙы. Өфөнөң агрегат заводы, Черниковскиҙәге иптәш Башилов етәкселек иткән төҙөлөш тресы коллективтәре беренсе кварталдағы өлгөлө эш күрһәткестәре өсөн Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алыуға достойн булдылар.

Үткән йылда артта ҡалып килгән төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһе предприятиеларында, Черниковск машиналар төҙөү, Өфө телефон аппараттары, Стәрлетамаҡ сода заводтарында, Өфө текстиль комбинатында квартал планы уңышлы үтәлде.

Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдергән, эске мөмкинлектәрҙе табыу һәм файҙаланыуҙа эшлекле саралар күргән, рентабеллелек өсөн ныҡышмалы көрәшкән коллективтарҙың уңыштары күренекле.

Әгәр бөтә коллективтар ҙа алдынғылар кеүек эшләһәләр, дөйөм уңыш һис шикһеҙ ҙур булыр ине. Ләкин улай булманы. Әһәмиәте һәм күләме яғынан да мөһим урын тотҡан нефть промышленносе үткән кварталда нефть сығарыу һәм бораулау пландарын үтәп еткермәне. Белорет металлургия һәм Баймаҡ баҡыр комбинаттары илгә бик күп суйын, ҡорос, баҡыр бирәп еткермәйенсә, Тыуған ил алдында бурыслы булып ҡалдылар. Урман промышленносе ағас әҙерләүҙең квартал планын 78 процентҡа ғына үтәне. Промысловой һәм инвалидтар кооперацияларының, урындағы промышленность Министрлығының предприятиелары насар эшләнеләр. Мөһим промышленность объекттары, торлаҡ төҙөү бурысы йөкмәтелгән күпселек төҙөлөш тресттарының эштәре бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек булды. Күп кенә тармаҡтарҙың пландарын үтәп еткермәү республика промышленносенең дөйөм уңышына насар йоғонто яһай.

Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы промышленноста биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планын үтәп еткермәү сериоз етешһеҙлек булып тороуын иҫкәртеп, артта ҡалыуҙың сәбәптәрен асты, пландарҙы үтәү һәм арттырып үтәү юлдарын күрһәтте. Беренсе кварталдың йомғаҡтары күп хужалыҡ етәкселәренең, партия һәм профсоюз ойошмаларының конференция иҫкәртеүҙәренә һәм талаптарына тейешле һығымта яһамағанлыҡтары, етәкселекте конкрет бурыстарға йүнәлтмәгәнлектәре тураһында һөйләй.

Башланған икенсе кварталда айырыуса яуаплы бурыстар тора. Промышленность предприятиелары был кварталда төп производство пландарын үтәүҙе тәьмин итеү менән бер рәттән, үҙҙәренең ярҙамсы хужалыҡтарында, эшселәрҙең коллектив һәм индивидуаль баҡсасылығында сәсеүҙе уңышлы үткәрергә, колхоз ауылына ярҙамды тағы ла көсәйтергә тейештәр. Был бурыстарҙы уңышлы башҡарыу өсөн, партияның өлкә конференцияһы талап иткәнсә, хужалыҡ органдарына етәкселек кимәлен хәҙерге талаптар юғарылығына күтәрергә кәрәк. Бөтә партия-политик эш, ойоштороу-техник саралар промышленностең, бигерәк тә уның артта ҡалыусы тармаҡтарының эшен ҡырҡа яҡшыртыуға, социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүгә йүнәлтелергә тейешле. Ә йөкләмәләрҙе үтәү өсөн һәр бер предприятиела мөмкинлектәр күп.

Нефтселәрҙең төп иғтибары аварияларҙы, буш тороуҙарҙы бөтөрөүгә, турбиналы бораулау, станоктарҙы электр көсө менән эшләтеү, бәләкәй механизацияны ҡулланыу сараларын производствоға киң индереүгә, вышкалар төҙөү-монтажлау эшен пландлы рәүештә алып барыуға, тиҙләтелгән метод менән бораулауҙы киң йәйелдерергә, эшләмәй ултырған скважиналарҙы яңынан эксплоатацияға биреүгә, парафинға ҡаршы көрәшкә йүнәлтелергә тейеш. Нефть промышленносендәге бай техника был бурыстарҙы үтәргә мөмкинлек бирә. Шулай уҡ нефть промышленносенең уңышлы эшләүе өсөн Өфө бүлексәһенең тимер юлсыларынан нефть ташыу эшен ҡырҡа яҡшыртыу талап ителә.

Юғары темп менән эшләү өсөн Белорет металлургтарының мөмкинлектәре лә күп. Бөтәһенән элек, комбинаттың үҙенә ҡараған тимер юлдың эшен яҡшыртырға, домна, мартен мейестәрендә суйын, ҡорос иретеү режимен һаҡларға, күмер, мазут, металды, электр энергияһын экономиялы тотонорға кәрәк. Урман промышленносе работниктәре һал ағыҙыуҙы уңышлы үткәреү менән бер рәттән, ағас ҡырҡыу һәм ташыу эшен механизациялауҙа, даими ҡадрҙар туплауҙа ныҡышмалы эш алып барырға бурыслылар. Йылға пароходствоһы работниктәре, күп кенә райондарҙың етәкселәре һал ағыҙыу эшендә урман промышленносена эшлекле ярҙам күрһәтергә бурыслы икәнлектәрен һис онотторға тейеш түгелдәр.

Төҙөлөш эштәренең иң яуаплы осоро килеп етте. Промышленность объекттарын, көн-күреш һәм культура биналарын төҙөү, капиталь һәм ағымдағы ремонт эштәре хәҙер киң ҡолас алырға тейеш. Төҙөлөш ойошмаларының бурысы әҙер материалдар килеүен көтмәүҙән, ә үҙҙәрендә төҙөлөш материалдары етештереүҙе киң ойоштороуҙан, күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялауҙан, тиҙ, арзан, юғары сифатлы итеп төҙөүҙән тора.

Хәҙер предприятиеларҙа май алды ярышы киң ҡолас ала бара. Беҙҙең нефтселәр Ленин—Сталин комсомолының утыҙ йыллығы хөрмәтенә республиканың бөтә йәштәрен социалистик ярышҡа сығырға саҡырҙылар. Партия, комсомол, профсоюз ойошмаларының производство командирҙарының бурысы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүгә арналған был ярыш менән бөтә массаны солғап алыуҙан, уны промышленность һәм транспорттың эшен ҡырҡа яҡшыртыуҙа көслө ҡоралға әүерелдереүҙән тора.

ЭЛЕКТР ПРОМЫШЛЕННОСЕ МИНИСТЕРСТВОҺЫНЫҢ С. М. КИРОВ ИСЕМЕНДӘГЕ ЛЕНИН ОРДЕНЛЕ ҺӘМ ХЕҘМӘТ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ ОРДЕНЛЕ «ЭЛЕКТРОСИЛА» ЗАВОДЫН ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАУ ТУРАҺЫНДА

СССР Верховный Советы Президиумы

УКАЗЫ

Бөйөк Ватан һуғышы осоронда хөкүмәт заданиеһен өлгөлө үтәгәне, энергетик һәм башҡа хужалыҡта күренекле тармаҡтарҙы электр оборудованиелары менән тәьмин иткәне өсөн һәм 50 йыл тулыу айҡанлы электр промышленносе Министерствоһының С. М. Киров исемендәге Ленин орденле һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле «Электросила» заводын Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе
Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре
А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
15 апрель 1948 йыл.

1948 йылдың I кварталында РСФСР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство планын үтәү йомғаҡтары тураһында

РСФСР статистика управлениеһенең белдереүе

1948 йылдың I кварталында РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы промышленносенең, ауыл хужалығының, автомобиль транспортының һәм коммуналь хужалыҡ предприятиеларының эштәре, капиталь эштәр күләме һәм ваҡлап һатыу тауар әйләнеше күләме түбәндәгесә характерлана:

I.

РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы промышленносендә 1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу 102 процентҡа үтәлде.

РСФСР Министерстволары тарафынан пландар түбәндәгесә үтәлделәр:

	1948 йылдың I кварталында квартал планының үтәлеше проценттарҙа
Урындағы промышленность Министерствоһы	99,3
Урындағы яғыулыҡ промышленносе Министерствоһы	104
Урман промышленносе Министерствоһы	92
Төҙөлөш материалдары промышленносе Министерствоһы	118
Еңел промышленность Министерствоһы	101
Текстиль промышленносе Министерствоһы	104
Аҙыҡ промышленносе Министерствоһы	110
Тәмле аҙыҡ промышленносе Министерствоһы	100,8
Ит һәм һөт промышленносе Министерствоһы	99
Балыҡ промышленносе Министерствоһы	98

II.

Промысловой кооперация һәм инвалидтар кооперацияһы буйынса 1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу планы 99,4 процентҡа үтәлде һәм промысловой кооперациялар системаһы буйынса үтәлеш түбәндәгесә:

	Проценттарҙа
РСФСР Министрҙар Советы эргәһендәге промысловой кооперация управлениеһы	99,2
РСФСР Министрҙар Советы эргәһендәге урман промысловой кооперация управлениеһы	111
Всекопсоюз	96

III.

РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы государство промышленносендә 1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 29 процентҡа һәм кооператив промышленносенең валовой продукцияһы 21 процентҡа артты.

РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы промышленносендә, промысловой һәм инвалидтар кооперацияларында 1948 йылдың I кварталында промышленность продукцияһы эшләп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, түбәндәгесә үҙгәрҙе:

	1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 1948 йылдың I кварталында проценттарҙа
Күмер	112
Торф—ташыу	123
Торф брикетлау	140
Ағас—ташыу	140
Кирбес	202
Әҙбиз	143
Алибастр	113
Черепица	296
Тәҙрә быялаһы	117
Эшкә яраҡлы ағас—ташыу	167
Киже-мамыҡ туҡымаһы	136
Йөн туҡымаһы	133
Етен туҡымаһы	130
Ҡаты күн тауарҙары	107
Йомшаҡ күн тауарҙары	118
Күн аяҡ кейемдәре	110
Иендән баҫылған аяҡ кейемдәре	112
Ойоҡ, ойоҡбаш изделиелары	125
Өҫкө трикотаж кейемдәре	104
Трикотаж бельелар	107
Тегеү машиналары эналәре	118
Салғылар	176
Балталар һәм колундар	220
Металл һауыт-һабалар	191
Столовой бысаҡтары	171
Столовой сәнскеләре	169
Фарфор тәрелкәләр	145
Шынаяҡтар	177
Сәйнүктәр	247
Мебель	120
Металл карауаттар	157
Патефондар	162
Музыкаль (сиртеп уйнай торған) инструменттар	154
Яҙыу машиналары	172
Ҡәләмдәр	133
Дәфтәрҙәр	116
Перолар	121
Мал майы	248
Үҫемлек майы	189
Ит	113
Икмәк-булка изделиелары	157
Макарон изделиелары	156
Кондитер изделиелары	171
Һабын	127

IV.

Ауыл хужалығында 1948 йылдың I кварталында совхоздарҙа, колхоздарҙа һәм машина-трактор станцияларында яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек, үткән йылға ҡарағанда, юғарыраҡ кимәлдә үткәрелде.

РСФСР-ҙың совхоздар, ит һәм һөт промышленносе, аҙыҡ промышленносе һәм тәмле аҙыҡ промышленносе Министерстволары совхоздарында тракторҙар ремонтлау планы 1948 йылдың 1 апреленә арттырылып үтәлде.

V.

РСФСР буйынса тотош алғанда 1948 йылдың I кварталында республикан һәм урындағы хужалыҡ буйынса капиталь эштәр күләме, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 120 процент тәшкил итте, шул иҫәптән:

	1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 1948 йылдың I кварталында проценттарҙа
Урындағы промышленность Министерствоһы	113
Төҙөлөш материалдары промышленносе Министерствоһы	121
Урман промышленносе Министерствоһы	184
Текстиль промышленносе Министерствоһы	115
Тәмле аҙыҡ промышленносе Министерствоһы	140
Балыҡ промышленносе Министерствоһы	144
Сауҙа Министерствоһы	144
Ауыл хужалығы Министерствоһы	160
Совхоздар Министерствоһы	191
Исполкомдарҙың коммуналь төҙөлөшө	146
Исполкомдарҙың торлаҡ-гостиницалар төҙөлөшө	128
Мәғариф Министерствоһы	135

VI.

Государство һәм кооператив сауҙаһының ваҡлап һатыу тауар әйләнеше күләме 1948 йылдың I кварталы дауамында айҙан-айға арта барҙы. Ваҡлап һатыу тауар әйләнеше 1948 йылдың ғинуар айындағы тауар әйләнеше менән сағыштырғанда, 1948 йылдың мартында 34 процентҡа артты. 1948 йылдың I кварталында государство һәм кооператив ваҡлап һатыу сауҙаһында халыҡҡа төп аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары һатыу байтаҡ үҫте.

Государство тарафынан ваҡлап һатыу хаҡын түбәнәйтеү, карточкаларҙы бөтөрөү һәм аҡса реформаһы үткәреү айҡанлы колхоз һәм кооператив баҙарҙарында тауарҙар хаҡы байтаҡ түбәнәйҙе.

VII.

РСФСР Автомобиль транспорты Министерствоһында 1948 йылдың I кварталында автотранспорт менән йөк һәм пассажирҙар ташыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, түбәндәгесә тәшкил итте: йөк ташыу буйынса—128 процент, пассажирҙар йөрөтөү буйынса — 126 процент. 1948 йылдың I кварталында йөк ташыу планы 101 процентҡа, пассажирҙар йөрөтөү 99,4 процентҡа үтәлде.

VIII.

1948 йылдың I кварталында коммуналь электр станциялары тарафынан электр энергияһы етештереп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 14 процентҡа артты.

1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 1948 йылдың I кварталында коммуналь водопроводтарҙан һыу ебәреү 8 процентҡа, трамвайҙарҙа һәм троллейбустарҙа пассажирҙар йөрөтөү 26 процентҡа артты.

IX.

1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 1948 йылдың I кварталында РСФСР-ҙың республикан һәм урындағы хужалыҡтарында эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һаны 6 процентҡа артты.

Карточканы бөтөрөү, аҙыҡ-түлеккә һәм промышленность тауарҙарына түбәнәйтелгән хаҡҡа күсеү, һатып алыуҙа һумдың әһәмиәте үҫеүе һәм реаль хеҙмәт хаҡының күтәрелеүе айҡанлы эшселәрҙең производствоға килеүе артты һәм бөтә урында ла хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫте.

X.

Оккупацияға дусар ителгән райондарҙа, 1948 йылдың I кварталында, урындағы промышленность һәм промысловой кооперация тарафынан валовой продукция эшләп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 24 процентҡа артты.

Был райондарҙа 1948 йылдың I кварталында ҡалаларҙа 150 мең квадрат метр самаһы торлаҡ майҙаны һәм ауыл ерҙәрендә 5 мең йорт төҙәлде һәм аяҡҡа баҫтырылды. Ауыл ерҙәрендә яңы төҙәлгән йорттарға 16 мең кеше күсерелде.

РСФСР Статистика Управлениеһы.

Ачинск ҡалаһында И. В. Сталин йорто-музейе

КРАСНОЯРСК. (ТАСС). Ачинск ҡалаһында И. В. Сталиндең йорто-музейен реконструкциялау тамамланды. Музей тантаналы рәүештә асылды. Иптәш И. В. Сталин 1916 йылдың декабрендә батша хөкүмәте тарафынан Туруханскиҙан Красноярскиға ебәрелә. Унан 1917 йылдың 20 февралендә Ачинскиға күсә һәм 1917 йылдың 8 мартына тиклем шунда йәшәй.

Йорт-музейҙа хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк юлбашсыһының Турухан крайында, Ачинск, Красноярскиҙа йәшәүен һәм деятельносен сағылдырған күп һандағы документтар, фотографиялар, монтаждар ойошторолған. И. В. Сталиндең Бөйөк Октябрь социалистик революцияһына әҙерләнеү осоронда ныҡышмалы эше һәм уның В. И. Ленин менән тотҡан элемтәһен сағылдырған материалдар айырым бер стендта ойошторолған.

И. В. Сталиндең йорт-музейена ҡаланың хеҙмәтсәндәре, студенттары, урта һәм башланғыс мәктәптәрҙең уҡыусылары, колхозсылар күп киләләр.

Ҡойоу һәм формовка машиналары

Мәскәүҙәге «Красная Пресня» машиналар төҙөү заводы яңы төрҙәге ҡатмарлы формовка һәм ҡойоу машиналарын эшләп сығарыуҙы юлға һалды.

Алдағы йылда предприятие бер нисә ҙур агрегат эшләп сығарасаҡ. Хәҙерге ваҡытта ҡыҫыу методы менән эшләй торған ҡойоу машинаһы һәм фасонлы стержендәргә формалар яһай торған пневматик машиналарҙың беренсе өлгөләре эшләнеп сығарылды.

Ҡыҫыу методы менән эшләй торған машина 1,5 килограмдан алып 2,5 килограмға тиклем ауырлыҡтағы бронза, алюминий һәм башҡа шундай төҫлө металдарҙан массовый деталдәр ҡойоуға мөмкинлек бирәсәк. Был машина сменаға 1000 деталь бирә. Уны тик бер кеше генә хеҙмәтләндерә.

Фасонлы стержендәргә формалар яһай торған пневматик стержен машинаһы сәғәтенә 30 формовка эшләй. Уны бары бер генә кеше хеҙмәтләндерә.

(ТАСС).

ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ

П. Т. Стаханова—Дәүләкән районы «Новая жизнь» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 28,35-әр центнер арыш урожайы алды.

А. Ф. Масленников — ВКП(б)-ның Дәүләкән район комитеты секретаре. Уның эше менән 1947 йылда район буйынса тотош алғанда бойҙайҙан һәм арыштан урожай алыу планы 25,8 процентҡа арттырылып үтәлеүе тәьмин итте.

Е. П. Кирсанов — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,5-әр центнер бойҙай урожайы алды.

Г. И. Новиков. — Миҙәкә районы «III Интернационал» колхозының бригадиры. Уның бригадаһы 1947 йылда 20,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,5-әр центнер бойҙай урожайы алды.

А. С. Чередниченко — Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 1947 йылда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,37-шәр центнер арыш урожайы алды.

Партия тормошо

Беҙҙең беренсе өлгәшеүҙәребеҙ

Завод партия ойошмаһының тапшырыуы буйынса мин 1943 йылдан бирле йәш коммунистарҙың политик уҡыуҙары менән етәкселек итергә тура килде. Хәҙер мин политик мәктәп менән етәкселек итәм. Мәктәптә даими рәүештә 18 коммунист уҡый. Был иптәштәрҙең күпселеге партия сафына Ватан һуғышы йылдарында ингәндәр.

Мәктәптә уҡыуҙарҙы башлап ебәрһәк тә, беренсе черәттә уҡырға йөрөү тәртибен нығытыу ауырға тура килде. Был мәктәптә уҡыусыларҙың күпселеге шоферҙар. Беренсе уҡыуҙарҙа уларҙың күпселеге йөрөмәне. Автогаражда партия ойошмаһының йыйылышын үткәреп, ҡайһы бер иптәштәрҙе тәртипкә саҡырырға тура килде. Ошо йыйылыштан һуң элек насар уҡыусы булып иҫәпләнгән Кузнецов, Мулюкин, Гридневский кеүек иптәштәр үҙҙәрен ҡулға алдылар, уҡыуҙа өлгәшеү кимәлдәрен дә яҡшырттылар.

Һуңынан бындай тәртипһеҙлектәр ҡабатланманы, уҡыусыларҙың политик активлыҡтары артты, уҡыуҙа өлгәшеү кимәлдәре ныҡ ҡына яҡшырҙы. Бының өсөн политик уҡыуҙарҙың практикала һыналған бөтә формаларын һәм бай системаларын киң рәүештә файҙаланырға тура килде. Беҙ гәзиттә һәр ай башында һәр бер уҡыусыны мәктәптең эш планы менән таныштырабыҙ. Әгәр ҙә теге йәки был иптәш ниндәй ҙә булһа сәбәп менән уҡыуға килә алмай икән, ул был көндең уҡыу темаһы буйынса конспект төҙөп килә. Мин улар менән айырым беседа үткәрәм. Мәҫәлән, Маврин һәм Копьев иптәштәр автомашинала эшләйҙәр. Улар менән йыш ҡына айырым рәүештә эш күрергә тура килә.

Уҡыу сәғәттәрен мөмкин тиклем йәнле, уҡыусының иғтибарын биләп алырлыҡ формала үткәреү ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Мин лекцияларымда йәнле беседалар, күргәҙмә пособиелар менән үткәрәм. Уҡыусылар һәр бер тема буйынса үҙ алдарына конспект төҙөп килеләр. Үтелгән тема буйынса һәр бер уҡыусының был теманы нисек үҙләштереүенә сериоз тикшереү үткәрелә.

«СССР Конституцияһы» темаһы буйынса «СССР граждандарының төп хоҡуҡтары һәм бурыстары» тигән теманы беҙ тулыһынса һорауҙа булдек. Һәр бер уҡыусы теманы тотош өйрәнеү менән бер рәттән айырым мәсьәлә буйынса үҙ алдына доклад әҙерләне. Һөҙөмтәлә ошо тема буйынса үткәрелгән уҡыуҙар ни бай йөкмәткеле булып үттеләр.

Уҡыуҙар башланған маҙҙа йәш коммунистар конспект төҙөй белмәй инеләр. «Нисек конспект төҙөргә» тигән темаға махсус занятие үткәрергә тура килде. Шунан һуң ғына уҡыусылар конспект төҙөргә, ярҙамсы фекерҙе төп фекерҙән айыра белергә өйрәнделәр.

Йәш коммунистарҙың өҫтәмә рәүештә политик, әҙәби китаптар уҡыуы мәктәп алдында торған политик-тәрбиә бурысын еңелерәк хәл итергә ярҙам итә. Мин гәзиттә һәр бер уҡыу һайын үтелгән тема буйынса белемен киңәйтергә теләгән иптәштәргә ниндәй китаптар, журналдар, брошюралар уҡырға кәңәш бирә килдем. Баштараҡ өҫтәмә рәүештә, бигерәк тә, әҙәби китаптар уҡыусылар бик аҙ ине. Якшевич, Бурыгин, Воловин кеүек йәш коммунистар әҙәби китаптар уҡыу эшенә мәктәптә уҡый башлағас ҡына тотондолар.

Ҡайһы бер иптәштәр газеталар уҡып барыуҙан да алыҫ тора инеләр. Бындай иптәштәрҙе газета уҡып барырға өйрәтергә тура килде. Башта теге йәки был тема буйынса өҫтәмә материал рәүешендә газеталарҙан файҙаланыу, илебеҙҙең эске хәлдәренә, халыҡ-ара хәл-мәсьәләләренә иғтибар итеүҙе талап итеү кешеләрҙе газеталар уҡырға күнектерҙе, мәктәптә уҡыусылар регуляр рәүештә газета уҡый башланылар.

Байтаҡ кәс һалынған, ныҡышмалы тырышлыҡ менән үткәрелгән саралар әрәмгә китмәнеләр. Беҙҙең мәктәп үҙенең уҡыу программаһын, Белорет короө-сыбыҡ канат заводы партия ойошмаһында беренсе булып, уңышлы рәүештә тамамланы. Беҙҙең мәктәптә уҡыусы йәш коммунист иптәш Помелов автогараж партия ойошмаһының секретаре итеп һайланды. Якшевич, Нижейский, Волков, Марков һәм тағы ла бик күп иптәштәр нехта агитатор булып эшләйҙәр. Был осорҙа мәктәптә уҡыусыларҙан дүрт кеше кандидатлыҡтан партия члены леген ҡабул ителделәр.

А. М. Климовцева,

Белорет короө-сыбыҡ заводы партия ойошмаһы эргәһендәге политик мәктәп етәксеһе

Политик мәктәптәрҙең эшен уңышлы тамамларға

Беҙҙең республикабыҙҙа тәүге партия ойошмалары эргәһендәге политик мәктәптәрҙә 14 мең кеше уҡый. Уларҙың күпселеге партия сафтарына Бөйөк Ватан һуғышы осоронда һәм унан һуңғы йылдарҙа ингән йәш коммунистар.

Политик мәктәптәр ауыл һәм колхоз активының политик уҡыуында ҙур роль уйнайҙар. Уларҙа 340 ауыл Советы председателе, 890 колхоз председателе һәм 2 мең самаһы бригадир уҡый.

Политик мәктәптәрҙең программаһы 4 — 5 айға иҫәпләнгән. ВКП(б) райкомдары политик мәктәптәрҙең эше менән систематик рәүештә шөғөлләнгән урында улар программаны тамамлауға яҡынлашалар. Мәҫәлән, «Абзан районында 6 политик мәктәп программаны февралдә уҡ үтеп бөттө, а 12 политик мәктәп [illegible] өйрәнә. Иомрыужа районында 7 политик мәктәп мартта уҡыуын тамамланы.

Ләкин ҡайһы бер райондарҙа уҡыуҙар ныҡ китеккә аҡрын бара. Мәҫәлән, Покровка һәм Бишбүләк райондарының бер нисә политик мәктәптәре [illegible]. Ә Дүртөйлө районының 9 политик мәктәбендә бары бер генә занятие үткәрелгән. Стәрлетамаҡ районының Иваново һәм Николо-Хуторянский тәүге партия ойошмаларында ВКП(б) райкомы инструкторҙары Романов, Клементьев иптәштәр етәкселек иткән политик мәктәптәр [illegible]. Бындай фактылар, үкенескә ҡаршы, башҡа райондарҙа ла бар.

[illegible] һәм улар политик мәктәптәрҙең эше үҙ ағышына тапшырылыуы, ВКП(б) райкомдарының уларҙың эшенә етәкселек итмәүҙәре тураһында һөйләйҙәр.

Әгәр партия райкомдары политик мәктәптәрҙә етәкселекте яҡшыртмаһалар һәм уларҙың [illegible], күпселек политик мәктәптәрҙең [illegible] программаны үтеп бөтөү [illegible].

60 сәғәтлек программаны бер нисә йыл «өйрәнеү» [illegible] ҡуйырға һис тә ярамай. Ә ундай хәл осрай. Мәҫәлән, Дүртөйлө районының [illegible] һәм Суҡкүл ауылдарында 1945 йылда уҡ ойошторолған политик мәктәптәр программаны әле көнгә тиклем «өйрәнәләр». Бындай политик мәктәптәрҙән уҡыусыларҙың файҙаһы аҙ, әлбиттә. [illegible]

Хәҙер партия ойошмалары политик мәктәптәрҙә ВКП(б) райкомдары [illegible] уҡыу программаһын [illegible] тейештәр. [illegible]

А. Байков.

Коммунистар политик белемдәрен күтәрәләр

Түбән Троицк сукно фабрикаһының партия ойошмаһы эргәһендәге партия мәктәбе 1945 йылдан бирле эшләп килә. 1947 йылдың сентябрендә мәктәптең икенсе набор менән уҡыуҙар башланды. Унда фабрика, леспромхоз һәм посёлка Советы коммунистары һәм партияһыҙ активтарҙан 26 кеше уҡый. Улар хәҙер «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсының» VIII главаһын тәүге сығанаҡтарҙан файҙаланып өйрәнәләр. [illegible] Уҡыусылар иптәш Стериндең [illegible] лекцияларын ихтибар менән тыңлайҙар.

Партия ойошмаһы мәктәптең был наборын да үҙ ваҡытында уҡытып сығарыу өсөн тырыша. Мәктәптә уҡыусыларға бөтә шарттар тыуҙырылған.

Бынан тыш фабрика партия ойошмаһы партия тарихы өйрәнеү түңәрәге һәм политик мәктәп ойошторған. Улар ҙа эштәрен уңышлы дауам иттерәләр. Политик мәктәп үҙенең эшен программаның 25 апрелдә тамамлауҙы күҙҙә тотоп ойошторҙо. Мәктәпкә [illegible] иптәш Козлова етәкселек итә. Уҡыусылар һәр тема буйынса [illegible] беседаларҙа актив ҡатнашалар. Занятиеларға йөрөү 85—90 процент тәшкил итә.

А. Шнейдман,

Туймазы районы, Түбән Троицк сукно фабрикаһының партбюро секретаре.

Беҙҙең республикала

ЙӘШ ПАРОВОЗСЫЛАР ЮҒАРЫ ТЕМП МЕНӘН ЭШЛӘЙҘӘР

Өфө паровоз ремонтлау заводында 650 кешенән торған 28 комсомолец-йәштәр бригадаһы байрам алды стахановсы вахтаға баҫып, хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ арттырҙылар. Арматур цехында иптәш Мартынов етәкселек иткән слесарҙар бригадаһы март айы планын арттырып үтәне һәм 80 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Слесарь Василий Левченко, тимерсе Александр Кильдяшев иптәштәр һәр көндә 3—4 норма биреп, башҡаларға өлгө күрһәтәләр.

ТЕЛЕФОН БӘЙЛӘНЕШТӘРЕ

Колхоз ауылдарын телефон бәйләнеше менән тәьмин итеү колхоздарҙы ауыл Советтәре һәм район ойошмалары менән булған эштәрен үҙ ваҡытында хәл итергә ҙур ярҙам итә.

Быйыл Бәләбәй районының күп кенә колхоздарын телефонлаштырыу планлаштырылған. Күптән түгел Сәрмәсән ауыл Советена ҡараған Чкалов исемендәге колхозға телефон үткәрелде. Шул уҡ ваҡытта «8 март», «Трудовик», «Возрождение», Буденный исемендәге һәм башҡа күп кенә колхоздарға телефон үткәреү өсөн әҙерлек эштәре алып барыла.

Ошо йылдың аҙағына тиклем районның 15 колхозы телефон бәйләнеше менән тәьмин ителәсәк.

КҮК ҺАҒЫҘҘАН ЮҒАРЫ УРОЖАЙ АЛЫУ ӨСӨН

Стәрлебаш районындағы күк һағыҙ үҫтереүсе колхоздар араһында Карл Маркс исемендәге ауыл хужалығы артеле күренекле урынды тота.

«Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» орденле иптәш Иәминев етәкселек иткән бригада 1947 йылда 7 гектар майҙандан 105 центнер күк һағыҙ тамыры, 148 килограмм күк һағыҙ орлоғо йыйып алды һәм колхозға 43 мең һум файҙа килтерҙе.

Иптәш Иәминев бригадаһы быйыл күк һағыҙ сәсеүлегенең һәр гектарынан кәмендә 18-әр центнер тамыр, 22-шәр килограмм орлоҡ йыйырға йөкләмә алды.

КОЛХОЗДА МАМЫҠЛЫ КӘЗӘЛӘР

Байыш ауыл Советындағы «8 март» колхозы (Абзан районы) 6 йыл инде мамыҡлы кәзәләр үрсетә. 1947 йылда колхоз государствоға йөн тапшырыуҙың йыллыҡ планын дебет менән үтәне һәм бынан тыш 8 мең һумдан артыҡ доход алды.

Ошо көндәрҙә кәзә мамыҡтарын беренсе тарау уҙғарылды. Һәм 20 килограмм беренсе сортлы дебет алып, государствоға тапшырылды. Хәҙер был колхозда мамыҡлы кәзәләр һаны 150 башҡа етте. Улар яҡшы тәрбиәләнәләр. Кәзәләрҙе юғалтыуһыҙ яҡшы тәрбиәләгәне өсөн колхоз правлениеһе Маймунә Әпсәләмоваға өҫтәмә хеҙмәт хаҡы өсөн 6 баш кәзә бирҙе.

КОЛХОЗ ХУЖАЛЫҒЫ ҮҪӘ

САЛАУАТ. Быйыл Крупская исемендәге колхозда май эшкәртеү заводы төҙөлдө. Завод колхозға ай һайын 2000 һум доход бирәсәк. Шулай уҡ 25 ат көслө двигатель һатып алынды, ул молотилканы һәм таҡта ярыу заводын хәрәкәткә килтерәсәк. Бынан башҡа ат һәм быҙау аҙбарҙары һәм тимерлек төҙөлдө. Тағы ла бер ат аҙбары һәм 70 баш һарыҡ һыйышлы торлаҡ һалына.

УҠЫУҘАР УҢЫШЛЫ БАРА

Баймаҡ ҡалаһының 1-се номерле урта мәктәбендә 426 бала уҡый. Балаларҙың өлгәшеүҙәре быйыл айырыуса яҡшы.

Мәктәптәге 26 уҡытыусының бөтәһе лә балаларҙың программаны үҙләштереүе өсөн ҙур тырышлыҡ күрһәтә. РСФСР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Мәдинә Фәйзуллина, БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы Фатима Ғәниева һәм уҡытыусы Борис Алексеевич Емельянов иптәштәр етәкселек иткән 2-се, 7-се һәм 10-сы кластарҙағы балалар яҡшы һәм отлично билдаларенә генә уҡып килмәләр.

— Беҙҙең урта мәктәп, — ти уның директоры иптәш Хәким Байназаров, — 1936 йылдан бирле эшләй. Былтыр уны 19 бала тамамлап сыҡты. Мәктәпте тамамлаусыларҙың бөтәһе лә хәҙер республикабыҙҙың юғары мәктәптәрендә уҡый. Ә быйыл беҙ 20 баланы уҡытып сығарасаҡбыҙ.

Агрегат заводының атаҡлы стахановсыһы Рәүеф Ғәләүетдинов һәр айҙы үҙ нормаһын 250—300 процентҡа еткереп үтәй.

Һүрәттә: иптәш Р. Ғәләүетдинов эш өҫтөндә.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ярыш инициаторҙарында

Өфө ҡалаһының промышленность предприятиелары араһында май алды социалистик ярыш инициаторы—Агрегат заводы коллективе алған йөкләмәһен намыҫлы рәүештә үтәп килә. Апрель айының тәүге декадаһы заданиеһе уңышлы башҡарылды. Март айының беренсе декадаһы менән сағыштырғанда апрель айының беренсе декадаһында продукция 18 процентҡа артыҡ эшләп сығарылды һәм продукцияның сифаты байтаҡ күтәрелде.

Начальниктәре Стрелков, Пузанов иптәштәр булған цехтар социалистик ярышта алдынғы сафта баралар. Улар тәүлек графиктәрен систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр. Мастерҙәре Киров, Сосиокевич иптәштәр булған участкалар яҡшы эшләйҙәр. Ҡатын-ҡыҙҙарҙан торған Вера Сосиокевич участкаһы көн һайын тәүлек графикте 130 процентҡа үтәй.

А. Сухов.

Срогынан алда

Өфө ҡалаһының яғыулыҡ тресы быйыл үҙенең эшен байтаҡ яҡшыртты. Беренсе квартал планы срогынан алда — ике айҙа үтәлде. Пландан тыш күп һанда ағас әҙерләнде. Трест етәкселәре беренсе башлап быйыл ағастарҙы ҡыш көнө һалға бәйләү эшен үткәрҙеләр. Был, ағастың үҙенә төшөү хаҡын күп арзанайта.

Горттың Иглин районындағы леспромхозы айырыуса яҡшы эшләй. Бында быйыл ағас, үҙған йылға ҡарағанда, ике тапҡыр күберәк әҙерләнде. Бында леспромхоз эшселәрҙең намыҫлы хеҙмәте арҡаһында өлгәште. Ағас ҡырҡыусы Мансур Кәримов, Клавдия Кәримова иптәштәр инде сезон заданиеләрен үтәнеләр.

Ағас әҙерләү эштәренә механизация индереү буйынса байтаҡ саралар күрелә. Леспромхоздарға электр бысҡылар ебәрелде. Ошо көндәрҙә күсмә электр станция алына.

Ф. Ҡачкин.

Республика буйынса план 160 процентҡа үтәлде

Ағымдағы йылда республиканың район маслопром работниктәре үҙ-ара социалистик ярышҡа сығып, һөт, май әҙерләү планын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы байрамына тиклем тултырыу йөкләмәләрен алғайнылар. Шул уңай менән байтаҡ раймаслопром работниктәре ошо йылдың беренсе көндәренән үк үҙҙәренең эшендә ҡырҡа боролош яһанылар.

Саҡмағош (директоры З. Исаев), Ҡыйғы (директоры Я. Мөхәмәтьянов), Илеш (директоры А. Ғалимов). Дыуан (директоры В. Шолохов) райондарының маслопром работниктәре алған йөкләмәләрен үтәү өсөн ҡараштә ҙур уңыштарға ирештеләр. Был райондар беренсе квартал планын һөт әҙерләү буйынса 160—210 процентҡа һәм май әҙерләүҙе 220—260 процентҡа еткереп үтәнеләр. Алдынғы райондарҙың планды арттырып үтәү һөҙөмтәһендә республика күләмендә беренсе кварталдың һөт, май әҙерләү планы 160 процентҡа үтәлде.

Тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәр өсөн

«Главторцветметаллдың» республикан контораһы коллективе (управляющие иптәш Угәкаев) ленинградлыларҙың саҡырыуына ҡушылып, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәргә йөкләмә алғайны. Социалистик ярыш яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Контора ағымдағы йылдың беренсе кварталында планды уңышлы тамамланы. Беренсе кварталға бирелгән 580 тонна төҫлө металл отходтары йыйнау заданиеһе арттырып үтәлде һәм пландан тыш 88,4 тонна металл бирелде. Был йыйналған металл эшкәртеү өсөн ауыр промышленность предприятиеларенә оҙатылды.

Заданиене үтәүҙә контораның Черниковск ҡалаһындағы уполномоченныйы Коляда, Өфө ҡалаһындағы уполномоченныйы Асанбаев иптәштәр яҡшы эшләнеләр.

Төҫлө металл отходтарын йыйнауҙа һәм уларҙы ауыр промышленность предприятиеларенә оҙатыуҙа директорҙары Алексеенко, Советов иптәштәр булған заводтар конторағы яҡындан торош булышлыҡ күрһәтәләр.

Республикан контораһы коллективе Беренсе Май байрамын тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәр менән ҡаршылау бурысын ҡуйҙы.

Р. Сафин.

Һалсылар йөкләмәһе

ҠАРИҘЕЛ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Ҙур Бирҙаш, Кесе Бирҙаш йылғалары буйында урынлашҡан Комсомол, Обызов һәм Булмаҙы урман участкалары һал ағыҙыуға алдан әҙерләнделәр. Бында эшселәр өсөн махсус торлаҡтар төҙөлдө, пекарня һәм ларектар асылды. Ҡыуғын үткәреү һәм һал ағыҙыу өсөн кәрәк булған кәмәләр, багорҙар һәм башҡа инвентарҙар етерлек һанда булдырылды.

Комсомол участкаһынан быйыл 5.700 фестметр ағас ағыҙылырға тейеш һәм участка коллективе ағас ағыҙыуҙы 8 көндә тамамлауға йөкләмә алды.

Булмаҙы урман участкаһы эшселәре лә һал ағыҙыуҙы ҡыҫҡа срокта тамамлауҙы бурыс итеп ҡуйҙылар. Улар 13 мең фестметр төҙөлөш ағасы ағыҙыуҙы 12 көндә тамамлауға һүҙ бирҙеләр.

Һал ағыҙыу ваҡытында эшселәр араһында агитацион-массовый эштәр киң йәйелдереләсәк, «боевой листоктар» сығарыласаҡ. Ошо маҡсатта участкаларға 12 агитатор билдәләнде.

Ғ. Исмәғилов.

Сезонға 6 йыллыҡ норма

Благовещен районындағы «Миндәм» колхозының тәжрибәле һунарсыһы Шәмсетдин Вәлиев ошо йыл сезонында йәнлек тотоу буйынса 6 йыллыҡ норманы үтәне.

Ул ағымдағы йылдың 1 кварталында 4 айыу, 6 төлкө, 25 һыуһар, бик күп һанда көҙән, тейен, аҫ һәм башҡа йәнлектәр тотоп, уларҙың тиреһен государствоға тапшырып 40 бот иген, төрлө продуктылар һәм промтауарҙар алды.

ФИЗКУЛЬТУРНИКТӘР ӨСӨН МОТОЦИКЛДАР

Өфө ҡалаһындағы «Динамо» магазине спорт ойошмалары өсөн «ИЖ—350» маркалы мотоциклдар алды. Был мотоциклдар БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге физкультура спорт комитете тарафынан алдынғы спорт ойошмаларына: ауыл хужалығы институтына, тимер юл техникумына, «Спартак» спорт обществоһына, Осоавиахимдың үҙәк советына һәм автомотоклубҡа бирелде.

ҠИРБЕС ЗАВОДЫ

ШАРАН. Райондың иң алдынғы «Түңәрәк» колхозы (председателе иптәш Ҡотлушин) 1948 йылда ҙур кирбес заводы һалыуҙы планлаштырғайны. Хәҙер завод бинаһын һалыу эштәре башланды. Уның өсөн 100 кубометр төҙөү материалы бирелде. Завод йылына 100 мең кирбес эшләп сығарасаҡ. Быйыл ул 50 мең кирбес бирергә тейеш.

Был завод яҡын тирәләге колхоздарҙы төҙөү материалы менән тәьмин итеп торасаҡ.

ҺАҠМАР СОВХОЗЫНДА

Һаҡмар итселек-һөтсөлөк совхозының үҙәк усадьбаһында 500 точкалы радиоузел төҙөлдө. Радио точкалар совхоздың 1-се һәм 2-се номерле фермаларына ла үткәрелде. Бында йәшәгән эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең 70-кә яҡын квартираһына электр үткәрелеп лампочкалар ҡуйылды.

Шулай уҡ 5-се номерле фермала мал торлаҡтарын һәм эшселәр квартираларын электрик яҡтылығы менән хеҙмәтләндереү өсөн ел двигателе ҡуйыуға әҙерлек эштәре бара.

* * *

Һаҡмар совхозында ағымдағы йылда мөгөҙлө эре малдар өсөн ес яңы мал торлағы төҙөү билдәләнгән. 2-се номерле фермала 100 баш быҙау өсөн ағастан эшләнгән ҡура һалыу тамамланыу алдында.

Бынан тыш совхоздың 3-сө номерле фермаһында 100 баш һауын һыйыр өсөн таш һарай һалына. Хәҙер 250 кубометр таш килтерелде лә инде һәм бында 12 кешенән торған ташсылар бригадаһы эшләй.

* *

Быйыл Һаҡмар совхозында йәшәүсе эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн 12 индивидуаль йорт төҙөү билдәләнде. Был йорттарҙы һалыу өсөн государство тарафынан 72 мең һум аҡса бүленде.

КОЛХОЗСЫЛАРҒА МЕДИЦИНА ЯРҘАМЫ

Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау Министерствоһы яҙғы сәсеү ваҡытында колхоздарҙы хеҙмәтләндереү эшен планлаштырҙы.

Ошо маҡсат менән Өфөнән 30 врач райондарға ебәрелде. Яслеләрҙә эшләү өсөн 2 мең кешене курстарҙа уҡытып сығарҙы. Ауылдарға 25 мең аптечка һәм 15 мең дана санитария әҙәбиәте оҙатылды.

Тиҙҙән Министерствоның 11 яуаплы работнигы райондарға докладтар менән сығасаҡтар.

Сәсеү ваҡытында 1.665 урында сезонлы һәм 200 урында даими медицина ярҙамы күрһәтеү пункттары асыласаҡ.

ЙЫЛЛЫҠ ПЛАН АРТТЫРЫЛЫП ҮТӘЛДЕ

Республикабыҙҙың алдынғы 48 районы һарыҡтарҙан бәрәс алыу буйынса йыллыҡ государство планын арттырып үтәнеләр. Саҡмағош районында һәр йөҙ баш һарыҡтан 93,3. Тәтешледә—87,7. Яңауылда — 86,5 һәм Кушнаренкола 84,4 бәрәс алынды.

Хәҙер малсылыҡ работниктәре йәш малдарҙы тулыһынса һаҡлап үҫтереү өсөн көрәшәләр.

ЯҘҒЫ СӘСЕҮГӘ ЯҢЫ МАШИНАЛАР

Башсельхозснаб базаларына яҙғы сәсеү өсөн кәрәк булған ауыл хужалығы машиналары килеү дауам итә. Новосибирскиҙан, Ростовтан, Нижне-Тагилдан, Курғандан сәсеү машиналары, һабандар, культиваторҙар килде.

Бәләбәй, Мәләүез, Яңауыл, Туймазы һәм башҡа күп кенә район колхоздары, МТС-тар 110 сәсеү машинаһы, 200 һабан, 339 культиватор алдылар. Шулай уҡ трактор, сәсеү машиналары өсөн күп һанда запас частар алынды.

Тәүге мөмкинлектәр тыуыу менән баҫыу эштәрен башларға!

Иптәш Мәхмүтова етәкселек иткән звенола

ШАРАН. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Почтальон егет алдынғы звеновод Мәхсүмә Мәхмүтова өйөнә яңы газеталар килтерҙе.

Мәхсүмә һәм уның дуҫ кыҙҙары республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында Указ урынлаштырылған газетаны түҙемһеҙлек менән көтә инеләр.

— Без көткән номер, дуҫтар, килде, — тине Мәхсүмә һәм ҙур рәсемдәр баҫылған газетаны өҫтәлгә килтереп йәйҙе. Бөтәһенең дә күҙе иң тәү сәскәле матур яулыҡ ябынған ҡатынға текәлде.

— Был шәкәр сөгөлдөрөнән юғары урожай алған Банат Батырова була инде, — тине звеновод.

— Үткән йыл ғына ул БАССР Верховный Советына депутат итеп һайланғайны, хәҙер Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алды. Намыҫлы хеҙмәт кешеләргә бына нисек дан килтерә, — тинеләр ҡыҙҙар.

Был ҡыҙҙар үҙған йыл колхоз баҫыуҙарында үҙ-үҙҙәрен аямай эшләнеләр. Улар звено ойоштороп, бөтә колхозсылар алдында юғары урожай алырға һүҙ бирҙеләр.

Намыҫлы хеҙмәт үҙенең гүзәл емештәрен бирҙе. Звено члендәре үҙҙәренә беркетелгән 22 гектар арыштың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алыуға өлгәштеләр. Ләкин башҡа бригадаларҙа даими звеноларҙың булмауы һөҙөмтәһендә колхоз бөртөклө ашлыҡ культураларынан урожай алыу планын үтәй алманы.

Колхозсыларҙан алып, колхоз етәкселәренә тиклем был ҙур хатаны яҡшы аңланылар һәм быйыл уны ҡабатламау өсөн бөтә сараларҙы күрәләр.

Үҙған йыл көҙҙән үк бөтә баҫыусылыҡ бригадаларында ла даими звенолар ойошторолоп, айырым участкалар бүлеп бирелде. Һәр бер звено үҙ участкаһына тирәҫ сығарҙы. Ашламалар әҙерләне. Бөтә сәсеү майҙанына етерлек яҡшы сортлы орлоҡ тупланды. Бөтә звенолар ҙа ҡар иреп бетер-бетмәҫтән ужым культураларын өҫтәмә аҙыҡландырыуға башлаясаҡтар. Бының өсөн 100-әр бот көл, кош тиҙәге һәм күп кенә тирәҫ шыйыҡсаһы әҙерләп ҡуйылды.

Быйыл, үҙған йылға ҡарағанда, 70 гектар бойҙай артыҡ сәселәсәк. Сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн тулы мөмкинлектәр бар. Быйыл ла 3 трактор эшләйәсәк, улар күптән үк колхозға килтерелделәр. Колхозсылар, бөгөндән баҫыу эштәренә сығырға әҙерҙәр. Улар 100 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан уртаса 30-ар центнер, ә ҡалған участкаларҙан 20 центнер урожай алыуға һүҙ бирҙеләр. Ә иптәш Мәхмүтова етәкселек иткән звено члендәре тағы ла юғарыраҡ урожай өсөн — 26 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 32-шәр центнер, 10 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 26-шар центнер урожай үҫтерергә йөкләмә алдылар.

И. Абдуллин.
«Кыҙыл юл» колхозы.

Звенолар бар, эштәре юк

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы ҡарары нигеҙендә Асҡын районы колхоздарында быйыл 226 звено ойошторолдо. Шуларҙың 126-һы юғары урожай һәм 96-һы орлоҡ участкаһы звеноһы. Алдынғы колхоздарҙа тәжрибәле етәкселәр ҡуйылған звенолар ойошторолоуҙың тәүге көндәренән үк эшкә башланылар. Сәсеү орлоктарын тазартыу, урындағы ашламаларҙы әҙерләү, ҡышҡы агротехник сараларҙы үткәреүҙә байтаҡ звеноларҙа эш социалистик ярыш нигеҙендә [illegible]. Мәҫәлән, «Моләж» колхозында Закиров етәкселек иткән звено баҫыуға 1000 йәк тирәҫ сығарып, 50 центнер көл һәм кош тиҙәге әҙерләне.

Ләкин күпселек колхоздарҙа был ойошторолған звенолар эшкә тотонмағандар әле. Мәҫәлән, «Сокол» колхозында звеновод Клавдия Кротова звено члендарын [illegible] белмәй. Был колхозда звенолар формаль ойошторолоу арҡаһында, үҙған йылда ла улар йыл әйләнәһенә эшләмәнеләр. Һөҙөмтәлә орлоҡ участкаһынан алынған иген колхозды орлоҡ менән тик 40—50 процентҡа генә тәьмин итте. Шуға ҡарамаҫтан, звенолар ойоштороуҙағы былтырғы хаталар быйыл да ҡабатланалар.

Районның орлоксолоҡ хужалығы булған «Бүләк» колхозында 12 звено ойошторолдо. Бында звенолар һаны күп, ләкин эштәре юк.

— Юғары урожай алыу өсөн ниндәй саралар күрәһегеҙ? — тигән һорауға,

— Хәҙергә бер нәмә лә эшләмәйбеҙ әле, — ти звеновод Шакир Закиров.

Эштең былай насар барыуында колхоз председателе Ғәлимшин дә, шулай уҡ агроном Старчиков та ғәйепле. [illegible] «XVIII партсъезд» исемендәге, «Восток», «Красный Октябрь» колхоздарында ла быйыл ойошторолған звенолар эшкә [illegible].

Район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы Галицкий, МТС агрономдары Белошин һәм Лотфуллин иптәштәр звенолар эшен юлға һалыуға звеноводтарға ярҙам итмәйҙәр, күберәк кабинетта ултырып звеноларҙың һаны тураһында мәғлүмәттәр йыйнау менән шөғөлләнәләр.

Ғ. Исмәғилов,
А. Солтанов.

„Новый быт" колхозында

Дәүләкән районы «Новый быт» колхозында үҙған йыл 6 звено ойошторолоп, бөтә йыл әйләнәһенә үҙ участкаларында эшләнеләр. Эш индивидуаль сдельщина нигеҙендә алып барылды. Ул дисциплинаны нығытыуға, хеҙмәтте иҫәпкә алыуға, звеноларҙың эшенә тейешле баһа биреүгә һәм юғары урожай алыуға ҙур мөмкинлек тыуҙырҙы.

Мария Пономарева дүртенсе йыл инде звеновод булып эшләй. Ул был ваҡыт эсендә бик бай тәжрибә тупланы, звено члендәрен яҡшылап эшкә өйрәтте. Үҙған йыл был звено 8 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 147-шәр бот урожай алды. Уның менән ярышыусы башҡа звенолар ҙа шундай уҡ юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Шуның һөҙөмтәһендә колхоз быйылғы сәсеү майҙанына етерлек сортлы орлоҡ менән тәьмин ителде. Колхозсылар хеҙмәт көндәренә 3 килограмм 500-әр грамм иген алдылар. Бынан башҡа звено члендәренә урожай алыу планын арттырып үтәгән өсөн һәр бер хеҙмәт көненә өҫтәмә рәүештә 5-әр килограмм иген бирелде. Өлгәшелгән уңыштар өсөн иптәш Пономарева СССР Верховный Советы Президиумы тарафынан «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене менән наградланды.

Үҙған йылғы тәжрибәләр нигеҙендә быйыл хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға айырыуса ҙур иғтибар бирелә. 8 звено ойошторолоп, уларға сәсеү участкалары, ауыл хужалығы инвентарҙары беркетелде. Звенолар эштең күләменә, төрҙәренә ҡарата төҙөлгән производство заданиелары нигеҙендә эш алып баралар. Звено члендәренең көндәлек эштәре дөрөҫ иҫәпкә алына, сифатҡа ҡарап баһа бирелә һәм һәр көндә кис эштең үтәлеүенә йомғаҡ яһала.

Иптәш Пономарева звеноһы быйыл үҙенә беркетелгән 30 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 150-шәр бот, 33 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 190-шар бот, иптәш Герасимова Анна звеноһы 65 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 130-ар бот, иптәш Тузова етәкселек иткән комсомолец-йәштәр звеноһы 65 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан [illegible] бот урожай үҫтереп алырға йөкләмә алып, үҙ-ара социалистик ярышка сыҡтылар.

Звенолар хәҙер ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу [illegible]. Агротехниканы өйрәнеү буйынса 2 түңәрәк эшләй. Уларҙың 12 занятиеһы үткәрелде. Агроном иптәш Казарин звено члендарының агротехник белемдәрен күтәреүгә [illegible] Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының эш методтарын өйрәнеүҙә ҙур ярҙам күрһәтә.

Н. Ғаббасов.

Ужымдарҙы аҙыҡландырғанда урындағы шарттарҙан сығып эш итергә

Ужымдарҙы минераль һәм урындағы ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырыу юғары урожай өсөн көрәштә мөһим сара.

Ҡар аҫтында ҡышлап сыҡҡан ужымдар көсһеҙләнгән булалар. Шуның менән бергә тиҙ генә йәнләнеп китеү өсөн яҙҙың тәүге көндәрендә уларға тупраҡта еңел үҙләштерелә торған аҙыҡтар, бөтәһенән дә элек иң кәрәкле азот етерлек күләмдә булмай. Был мохтажлыҡты өҫтәмә аҙыҡландырыу аша ҡәнәғәтләндереп була.

Үҫемлектәрҙең азотлы ашламалар менән аҙыҡланыуы үҙ нәүбәтендә уларҙың фосфор һәм калий ашламаларына булған талаптарын көсәйтә. Шуға күрә үҫемлектәрҙе азотлы, фосфорлы һәм калийле ашламалар менән аҙыҡландырырға кәрәк. Ҡышҡы осорҙа аҙыҡ етешмәүҙән зәғифләнгән үҫемлектәр яҙ көнө өҫтәмә аҙыҡландырыу арҡаһында яҙғы дымдан тулы файҙаланалар һәм яҡшы үҫә башлайҙар. Өҫтәмә аҙыҡландырыу иртәрәк сроктарҙа үткәрелгән һайын файҙалыраҡ була. Ужымдарҙы ҡар иреп бетер-бетмәҫ саҡта уҡ аҙыҡландырырға кәрәк. Шулай булғанда ашламалар дымлы тупраҡта яҡшы иреййҙәр һәм үҫемлектәр уларҙы тамырҙары аркылы еңел үҙләштерәләр.

Аҙыҡландырыу файҙалы булһын өсөн ашламаларҙы дөрөҫ һайлап алырға һәм еңел үҙләштерелә торған формаларҙы ҡулланырға кәрәк. Фосфорлы, азотлы һәм калийле ашламаларҙың бөтәһен бергә ҡулланыу үҫемлектәрҙең талаптарын тулы үтәй ала. Бер гектар майҙан сәсеүлекте аҙыҡландырыу өсөн ашламаларҙа 20—30 килограмм туҡлыҡлы матдә булырға тейеш.

Аҙыҡландырыу өсөн ҡулланыла торған ашламаларҙың күләме һәм төрө сәсеүлектең, тупраҡтың торошона ҡарап билдәләнә.

Урындағы шарттарҙы иҫәпкә алып, республикабыҙҙың **төньяҡ райондары өсөн** бер гектар майҙанды аҙыҡландырыуға ашламаларҙың түбәндәге комбинацияларын һәм нормаһын тәҡдим итәлә:

1. Көл 3—4 центнер, суперфосфат 150 килограмм — яҙ ҡар бәтербәтмәҫтән индерелә һәм тирәҫ шыйыҡсаһы 5—6 тонна — ужымдарҙы тырматыу алдынан индерелә.
2. Көл 3—4 центнер һәм янған тирәҫ 7—8 тонна — яҙ ҡар бәтербәтмәҫ саҡта индерелә.
3. Кош тиҙәге 6—8 центнер һәм көл 3—4 центнер — яҙ ҡар бәтербәтмәҫ саҡта индерелә.
4. Аммиак селитраһы 80 килограмм, суперфосфат 200 килограмм, 40 процентле калий тоҙо 100 килограмм — ҡар бәтер-бәтмәҫтән индерелә.

Көньяҡ райондар өсөн:

1. Кош тиҙәге 6—8 центнер — ҡар бәтер-бәтмәҫ саҡта индерелә.
2. Аммиак селитраһы 80 килограмм, суперфосфат 200 килограмм, 40 процентле калий тоҙо 100 килограмм — ҡар иреп бәтербәтмәҫ саҡта индерелә.
3. Көл 2—3 центнер ҡар бәтербәтмәҫ саҡта һәм тирәҫ шыйыҡсаһы 5—6 тонна ужымды тырматыу алдынан индерелә.
4. Суперфосфат 500 килограмм — ҡар бәтер-бәтмәҫ саҡта һәм тирәҫ шыйыҡсаһы 5—6 тонна тырматыу алдынан индерелә.

Урындағы шарттарға ҡарап, ашламаларҙың ҡушымта күләме үҙгәрергә мөмкин, ләкин ҡушымталарҙа азот, фосфор һәм калий матдәләре 20—30 килограмдан кәм булмаҫҡа тейеш. Тик ошондай ашламалар ғына уңышлы һөҙөмтәләр бирәсәк.

Ужымдарҙы аҙыҡландырыу өсөн ашламаларҙы ҡоро көйөнсә лә һәм һыуға иреп тә ҡулланып була. Сәсеүлектәргә яҙ бик иртә аҙыҡландырған саҡта көл, кош тиҙәге, компост, янған тирәҫ һәм бөтә минераль ашламаларҙы ҡоро көйөнсә лә файҙаланырға ярай. Тик уларҙы ныҡлап ваҡларға, унан һуң ғына сәсеүлектәр өҫтөнә тигеҙ итеп һибеп сығырға кәрәк. Үҫемлектәр ҡоро булырға тейештәр, юҡһа дымлы үҫемлек өҫтөнә күп күләмдә һибелгән ашлама, уны яндыра. Ашлама яҡшы йоғонтоло булһын өсөн тупраҡтың дымлы булыуы шарт, шул ваҡытта ғына ашламалар үҫемлектәр тарафынан тиҙ үҙләштереләсәктәр. Бына шуға күрә лә агрономия фәне ужымды өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы бик иртә яҙа, баҫыуҙа ҡар бәтербәтмәҫ саҡта үткәреүҙе тәҡдим итә. Әгәр ҙә был уңайлы ваҡыт үткәрелеп ебәрелһә, ашламаны һыуҙа иретеп [illegible]. Хәтта тирәҫ шыйыҡсаһы ла [illegible] ҡулланылған ашлама 4—5 тапҡыр [illegible] булырға тейеш.

Ю. Усманов.
Ауыл хужалыҡ фәндәре кандидаты.

Баҫыу эштәре башланды

ДҮРТӨЙЛӨ. (Телефон аша). «Ағым» колхозы баҫыуҙарында ҡыҙыу эш башланды. Звено члендәре үҙ участкаларында күберәк дым туплау өсөн ҡар һыуҙарын тотоу эштәре алып барҙылар. Ике көн эсендә 40 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотолдо.

Бер нисә көндән үк ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыу эштәре башланасаҡ. Быйыл өсөн звенолар 750 центнер тирәҫ шыйыҡсаһы, 40 центнер көл, 20 центнер кош тиҙәге йыйғандар.

«Урал» колхозы баҫыуҙарында ла ҡар һыуҙарын тотоу ҡыҙыу бара. 22 гектар майҙанда был сара үткәрелде инде.

Ғ. Хәснотдинов.

РЕДАКЦИЯҒА ХАТ

Колхоз Уставын боҙоусы Фәтхуллинга ҡасан сара күрәләр?

Беҙҙең Салауат исемендәге колхоз Воскресен районында иң артта ҡалған хужалыҡтарҙың береһе.

Колхоз председателе Фәтхуллин колхоз хужалығы менән етәкселек итеүҙә артель Уставын боҙа.

Үҙған хужалыҡ йылына үткәрелгән ревизия колхозда иҫәп-хисап эштәренең бик ныҡ буталғанлығын күрһәтте. Хисапсы Н. Йосопова тарафынан ялған документтар яһау фактылары ла бик күп. 29 килограмм балдың ҡайҙа һәм нәмә өсөн тотолғанын күрһәткән бер генә төрлө лә документ юк.

Колхоз председателе Фәтхуллин үҙған йыл 6000 һумлыҡ бесәнлек һатып, уның аҡсаһын үҙләштерҙе. Бынан башҡа ул колхоздың ике кәбән бесәнен һата. Үҙенең енәйәтен йәшерер өсөн Фәтхуллин «колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы ҡарары менән һатылды» тип үҙ ҡулы менән протокол яҙа.

Колхоздың сәсеү орлоғо менән 30 процентҡа генә тәьмин ителеүенә ҡарамаҫтан, орлоҡто туҙҙырыуға, әрәм-шәрәм итеүгә юл ҡуялар. Фәтхуллин кладовщик А. Ишбулатов һәм хисапсы Н. Йосопова менән бер булып колхоз келәтенән 70-әр килограмм иген алдылар.

Үҙған йыл малсылыҡты үҫтереү планы ла үтәлмәне. Фәтхуллин ферма өсөн малдар һатып алыуға, тип февраль айында Госбанктың район бүлексәһенән 1500 һум аҡса ала. Ләкин ул был аҡсаны ла туҙҙыра.

Район ойошмалары Салауат исемендәге колхоз председателе Фәтхуллиндең колхоз Уставын боҙоуын яҡшы беләләр. Был тураһа ВКП(б) райкомына, район ауыл хужалығы бүлегенә лә һәм прокуратураға ла бик күп сигнал бирелде. Ләкин ошо көнгә тиклем Фәтхуллинга бер ниндәй ҙә сара күрелгәне юк.

Х. Даутов,
Воскресен районы, Салауат исемендәге колхоздың ревизия комиссияһы председателе.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» материалдары эҙенән

„Ҡарарҙар сығарыу менән генә тынысланалар"

Ошо йыл башында «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 31-се номерында Мәҡар районы «Новый путь» һәм «Знамя труда» колхоздарының сәсеүгә насар әҙерләнеүҙәре, колхоз етәкселәренең сәсеү орлоҡтарын төрлө расходтарға тотоуҙары тураһында хәбәрсе иптәш Ғәлиевтең материалы баҫылып сыҡҡайны.

Материалда күрһәтелгән фактылар дөрөҫләнде.

Сәсеү орлоҡтарын әрәм-шәрәм иткәне өсөн «Новый путь» колхозы председателе Никитин колхоз члендарының дөйөм йыйылышы ҡарары нигеҙендә председателлектән алынды.

«Знамя труда» колхозында расходҡа тотолған орлоҡ материалдары колхоз председателенән түләтелде.

„Дыуанда ашыҡмайҙар"

Дыуан районында яҙғы сәсеүгә әҙерлектең барышын тикшереү буйынса хәбәрселәр рейде үткәрелгәйне. Рейд материалдары «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһында (№22) баҫылып сығыу менән партияның район комитетында тикшерелде.

Тикшереү һөҙөмтәһе тураһында ВКП(б)-ның Дыуан райкомы секретары иптәш Темнов редакцияға түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

— «Дыуанда ашыҡмайҙар» тигән материал дөрөҫ бирелгән. Был мәсьәлә буйынса колхоздарҙа күп кенә саралар үткәрелде. Мәҫәлән, «Игенсе» колхозында 45 кешенән торған 5 звено ойошторолоп, уларға тартыу көстәре, ауыл хужалыҡ инвентарҙары һәм 134 гектар сәсеүлек майҙаны беркетелде. Шулай уҡ, «Заря», «Ударсы» колхоздарында ла инвентарҙарҙы ремонтлау тамамланды, баҫыуҙарҙа ҡар тотоу үткәрелде, агротехник уҡыуҙар алып барылды.

Йыйып алғанда, рейд материалында күрһәтелгән колхоздарҙа ғына 3 мең 521 гектар майҙанда ҡар тотолдо һәм баҫыуҙарға 10 мең [illegible] тирәҫ сығарылды.

Комбинат проект ҡеүәтен үҙләштерергә тейеш

Бер нисә йылдар буйына государство планын систематик өҙөп килгән Өфө туҡыу комбинаты ағымдағы йылда беренсе квартал планын 106 процентҡа үтәне. Пландарҙың быға саҡлы үтәлмәүенә киндер-ҡамыш иләү фабрикаһының туҡыусыларҙы тейешле күләмдә киндер менән тәьмин итмәүе төп сәбәптәрҙең береһе булып торҙо. Фабриканың ватер цехына сирле әҙерләүсе тарау-лента цехы ҡалдыҡ сырьены бирел еткермәне. Был бүлектә машиналарға сифатһыҙ насар ҡарау, уларҙы үҙ ваҡытында ремонтламау, майламау, профилактик саралар үткәрмәү, һөҙөмтәһендә станоктар, оборудованиелар сафтан тиҙ сыға барҙылар. Ә был иһә тотош комбинаттың эшен ваҡыт-ваҡыты менән туҡтатып тороуға килтерҙе.

Комбинаттың оборудованиеларына ағымдағы һәм капиталь ремонт үткәреүгә саҡырылған механик цех фабрикаларҙың заказдарын насар башҡара ине. Шуның менән бергә, ремонттан сыҡҡан машиналар, станоктар өҫтән генә ремонтланып цехтарға бер ниндәй [illegible] тапшырылғандар. Былай хужаһыҙлыҡ арҡаһында станоктар бер нисә көн, хатта бер нисә сәғәт эшләгәндән һуң ремонтҡа кире ҡайтарылғандар.

Тик үҙған йылдың икенсе яртыһында ғына комбинат агрегаттарының эшләмәй тороуҙары 178 мең станок-сәғәт тәшкил итте. Икенсе төрлө әйткәндә, машиналарҙың тик тороуы арҡаһында комбинат Тыуған илгә бер миллион 256 мең метр туҡыма бирел еткермәне.

Ленинградсыларҙың патриотик саҡырыуына ҡушылып, комбинат коллективы [illegible] сталинса биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышҡа ҡушылды. Комбинаттың инженер-техник работниктарының инициативаһы һәм ижади эҙләнеүҙәре быға саҡлы күрелмәгән эске ресурстарҙы асырға һәм уларҙы киң масштабта файҙаланырға мөмкинлек тыуҙырҙы. Механик цехтың эшендәге етешһеҙлектәрҙең нигеҙ сәбәптәре запас частарҙың етешмәүенә бәйле булды. Был частар элек башҡа заводтарҙан килтереләү арҡаһында производствола бик күп тотҡарлыҡтар булды. Инженерҙарҙың ныҡышмалы хеҙмәттәре нигеҙендә былай частарҙы комбинаттың мастерскойында етештереү үҙләштерелде. Шулай итеп, механик цех комбинаттың тотҡарлыҡһыҙ, ритмлы эшләүенә күп ярҙам итте. Шулай уҡ рационализатор тәҡдимдәргә һиҙгер ҡарау, уларҙы тормошҡа ашырыу механик цехтың етештереүсәнлеген арттырыуға мөмкинлек бирҙе.

Комбинаттың партия ойошмаһы ойоштороу-техник саралар планынан сығып, цехтарҙағы комплекттарҙы асыу маҡсатында массовый рәүештә тикшереү ойошторҙо. Һөҙөмтәлә оборудованиеларҙы сифатһыҙ насар эксплоатациялау ваҡиғалары бөтөрөлдө. Мастерҙар араһында үҙ эштәренә яуаплыһыҙ ҡарашҡа сик ҡуйылды. Партия ойошмаһы береһе һәүбәттә эш сифаты өсөн яуаплылыҡты коммунистарҙан большевистик принциплы талап итте. Администрация эшкә һалҡын ҡараған начальниктарҙы, мастерҙарҙы прогрессив эш хаҡынан мәхрүм итте. Мәҫәлән, смена мастеры Сипровская һәм башҡа бер нисә кешегә декабрь һәм ғинуар айҙарында прогрессив хеҙмәт хаҡы түләнмәне. Был саралар комбинат эшенә ыңғай йоғонтолар яһаны. Киндер-ҡамыш иләү фабрикаһының [illegible] етештереүсәнлек һиҙелерлек рәүештә үҫте. Ул көндәлек заданиеһын элек 60 процентҡа ғына үтәһә, ғинуар айының икенсе яртыһынан алып, тулыһынса үтәй һәм квартал буйынса ритмлы эшләп килә.

Туҡыу комбинатының беренсе кварталдағы уңыштары үҙенән-үҙе генә килмәне. Уларҙы эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр киң йәйелдерелгән социалистик ярышты [illegible] ойоштороп, намыҫлы көрәштә яулап алдылар. Бындағы бөтә эшселәр, турана-тура производствола эшләгән инженерҙар, техниктар индивидуаль социалистик ярыш менән солғап алынғандар. Коллективтың сдельщина нигеҙендә эшләүсе 77 эшсеһе үҙенең биш йыллыҡ планын өс йыл ярымда үтәү өсөн көрәшә.

Коллективтың һүҙе эштән айырылмай. ВКП(б) члены, ватерщица иптәш В. Кудкина көндәлек нормаһын 300 процентҡа етереп үтәй. Совет Армияһынан демобилизацияланған мастер ярҙамсылары Поселкин, Курамшин, Александров, Сергеев һәм Ларин иптәштәр 26-28 машина хеҙмәтләндереп, көн дә бер ярым норма бирел киләләр. Туҡыусы коммунисткалар Маркова, Мудрецова, Тихонова, киндер-ҡамыш иләүселәр Хангильдина, Калашникова һәм башҡа иптәштәр йөкләмәләрен уңышлы үтәйҙәр. Шулай итеп, коммунистар үҙҙәренең гүзәл хеҙмәттәре менән партияһыҙ массаларға өлгө булып торалар. Коллективта нормаһын үтәмәгән бер генә коммунист та юк.

Комбинатта 133 йәш үҫмерҙе берләштергән 15 комсомолец-йәштәр бригадаһы эшләй. Йәштәр ҙә стахановсы хеҙмәт өлгөһө күрһәтәләр. Котлохматова, Шаймөхәмәтова, Киселева, Лебедева һәм башҡалар айырыуса юғары хеҙмәт етештереүсәнлегенә ирештеләр.

Күп станоксылар һаны арта бара. Туҡыусылар араһында өс станок урынына 4-6 станокта эшләүселәр 154 кеше. Ә инде ватерщицалар сафында бер станок урынына бер ярым һәм ике станок хеҙмәтләндереүселәр өс тиҫтәгә етә.

Алдынғы эш тәжрибәһен коллективҡа яңы килеүселәргә еткереү мәсьәләһенә айырыуса иғтибар ителә. Комбинаттың атаҡлы стахановсылары эштәге яңы методтарға эшселәрҙе массовый өйрәтеү өсөн станокта, практик эш өҫтөндә үҙ методтарын башҡаларға күрһәтәләр. Әлегә стахановса эшләүгә өйрәнеп етмәгән эшсене үҙ станогында айырым өйрәтеү менән бергә, былай методтар стахановсыларҙың машиналарында ла эшләп күрһәтелә.

Характерле бер сара тураһында әйтергә кәрәк. Коллективта туҡыусы Мудрецованың: «Минең стахановса эшләү методтарым һәм алымдарым» тигән темала лекцияһы ойошторолдо. Лекция күргәҙмәле әсбаптар менән алып барылды. Иптәш Мудрецоваға эшселәр араһында сығыш яһау өсөн инженерҙар күп ярҙам күрһәттеләр. Профсоюз ойошмаһы комбинаттың атаҡлы хеҙмәт мастеры Мудрецованың эш алымдарын тулы сағылдырыусы плакат яһаны. Был саралар маҡсатҡа ярашлы һөҙөмтәләр бирҙеләр. Мудрецованан өйрәнеүсе стахановсылар уның хеҙмәт күрһәткестәрен уҙып киттеләр. Мәҫәлән, уның лекцияһынан һуң туҡыусы иптәш Крюкова хеҙмәт етештереүсәнлеген көндән-көн күтәрә башланы. Һәм бер аҙ ваҡыттан һуң, алдынғылыҡты үҙ ҡулында тотоп килгән Мудрецова иптәште ыңғып етеп, уҙып китте. Алдынғылыҡ өсөн көрәш көсәйгәндән-көсәйҙе. Ике аҙнанан һуң инде Крюкова өлгәшкән күрһәткестәр артта ҡалды. Туҡыусы Балабанова, быға саҡлы күрелмәгән рекорд бирел, комбинатта алдынғылыҡты яулап алды.

Комбинатта бөтә профессия хеҙмәтсәндәренең социалистик ярышын юғары күтәреү һәм уның тәьҫир яһауы формаларын киң йәйелдереү, кадровый эшселәрҙең йәш эшселәргә профессия үҙләштерергә ярҙам итеүҙәре, күп станок хеҙмәтләндереү методтарын индереү фабрикаларҙа эшселәрҙең һанын ҡыҫҡартырға мөмкинлек бирҙе, эшселәрҙең етештереүсәнлеген үҙған йыл менән сағыштырғанда сәғәтенә 2,9 килонормаға, оборудованиеларҙың етештереүсәнлеген 33 килонормаға арттырҙы.

Фабрика-завод комитеты социалистик йөкләмәләрҙең үтәлешен эшселәргә еткереү өсөн оператив саралар күрә. Һәр бер эшсенең көндәлек хеҙмәт күрһәткестәре икенсе көндә эш башланыуға цехтарға ҡуйыла. Ярыш һөҙөмтәләрен тикшереүсе комиссиялар һәр 10 көн һайын цех йыйылыштарына социалистик ярыш һөҙөмтәләрен ҡуя, ә ай аҙағында комбинат профсоюз ойошмаһының киңәйтелгән пленумында социалистик ярыштың үтәлеше тураһында мәсьәлә ҡарала. Бында алдынғы эшселәр һәм цехтар билдәләнә, асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү саралары күрелә.

Коллектив Бөтә Союз социалистик ярышҡа сыҡҡанда, ағымдағы йыл аҙағына илгә пландан тыш 200 мең метр туҡыма бирергә, государство дотацияһынан бер миллион 200 мең һум аҡса алмаҫҡа йөкләмә алғайны. I кварталда коллектив пландан тыш 71 мең метр туҡыма етештерҙе һәм өс айҙа государствонан дотация буйынса тейешле булған 300 мең һум аҡсаны алманы.

Был уңыштар аҙ түгел, әлбиттә. Ләкин комбинат коллективы бының менән генә тынысланырға тейеш түгел. Уның алдында ҙур һәм мөһим бурыс тора. Туҡыусыларҙан фабрикаларҙың проект ҡеүәтен тулыһынса үҙләштереү талап ителә.

С. Мәҙлютов.
М. Каримов.

СССР менән Италия араһында сауҙа һөйләшеүҙәре тураһындағы мәсьәләгә ҡарата

СССР менән Италия араһында сауҙа һөйләшеүҙәренә ҡарата 2 апрелдә яҙылған хәбәрҙә, Совет Хөкүмәтенең 30 март нотаһында Италия хөкүмәтенә Италия делегацияһы менән Мәскәүҙә алып барылған һөйләшеүҙәрҙең программаһын килешелгән, тип иҫәпләгәнлеге күрһәтелгәйне. Был программа түбәндәгесә: 1) тауар әйләнеше һәм түләүҙәр тураһында килешеү төҙөү, 2) репарациялар тураһында килешеү төҙөү һәм 3) сауҙа һәм диңгеҙҙә йөҙөү тураһында договор төҙөү.

Италия Хөкүмәте 2 апрель нотаһында, Совет Хөкүмәтенең шул күрһәтелгән нотаһына яуап бирел, Мәскәүҙәге һөйләшеүҙәрҙең тәҡдим ителгән программаһының 1-се һәм 3-сө пункттары менән риза булды, ә 2-се пунктҡа ҡарата Совет Хөкүмәтенән Италия Хөкүмәтенең шул пунктты аңлатмаһы менән ризамы икәнлеген белдереүен һораны. Быға яраҡлы рәүештә һөйләшеүҙәр барышында: 1) Поставкаларҙың ғына түгел, бәлки шулай уҡ был заказдарҙы үтәүҙең һәр төрлө башланғысының да Ярашыу Договорында билдәләнгән сроктан элек була алмауҙары тураһында килешеүгә өлгәшелгән ваҡытта репарациялар иҫәбенә поставкаларҙы үтәү өсөн шулай уҡ заказдар программаһы тикшерелер ине, һәм 2), Ярашыу Договорының 74-се статьяһының 2-се пунктындағы подпунктта күҙҙә тотолған түләүҙәр өйрәнелер ине. Бында, билдәле булғанынса, Италияның Румыниялағы, Болгариялағы һәм Венгриялағы активтәре репарацияларҙы каплау өсөн хеҙмәт итеүсе сығанаҡтарҙың береһе булып торалар, тип күрһәтелә.

11 апрелдә, Совет Хөкүмәте Италия Хөкүмәтенә нота ебәрҙе. Был нотала ул, Совет Хөкүмәтенең 30 март нотаһында күрһәтелгән һөйләшеүҙәр программаһының 2-се пункты («репарациялар тураһында килешеү төҙөү») Италия Хөкүмәтенең 20 апрель нотаһында хәтергә алынған ике мәсьәләне тикшереүҙе күҙҙә тота, тип белдерҙе. (ТАСС).

ХРОНИКА

Американың Мәскәүҙәге хәбәрсеһе Р. Магидовтың шпионлыҡ эшмәкәрлеге тураһында 15 апрелдә «Известия» газетаһында граждана Нельсондың хаты баҫылып сығыу айҡанлы Магидов СССР Сит ил Эштәре Министерствоһына саҡырылды, һәм уның, һис киҫекһеҙ, ССР Союзынан китергә тейешлеге тураһында уға белдерелде.

(ТАСС).

Америка компартияһы милли комитетенең белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 13 апрель. (ТАСС). «Дейли Уоркер» газетаһы Америка компартияһы милли комитетенең белдереүен баҫып сығарҙы. Был белдереүгә милли комитет председателе Фостер һәм комитеттең генеральный секретаре Деннис ҡул ҡуйғандар. Белдереү вәкилдәр палатаһының Америкаға ҡаршы алып барыла торған эште тикшереү буйынса комиссияһы тарафынан үҙгән аҙнала тәҡдим ителгән коммунизмға ҡаршы закон проектын ҡаты рәүештә тәнҡитләй. Белдереүҙә, закон проекты компартияны «енәйәтсе заговор» итеп квалификациялау, «теләһә ниндәй саралар менән» АҠШ хөкүмәтенең формаһын үҙгәртеүҙе закондыҙ тип иғлан итеү, сауҙалы йәки АҠШ хөкүмәтенең эшмәкәрлеген боҙоуҙы енәйәт эш тип иғлан итеү һәм «коммунистик фронт» ойошмаһына инеүсе ойошмаларҙы регистрациялауҙы талап итеү маҡсатын тота, тип әйтелә.

«Америка монополияларының политик агенттәре, — тип әйтелә шунан ары белдереүҙә, — компартия ҡасан да булһа көс йәки көслөк методын ҡулланыуҙы яҡлаҫы, йәки сит ил государствоһы агенте сифатында хәрәкәт итте, тигән үҙҙәренең раҫлауҙарын иҫбат итергә һәләтһеҙ икәнлектәрен танығандар, һәм шуға күрә улар закон проектын тәҡдим иттеләр. «Коммунизмға ҡаршы көрәш» маскаһы артына йәшерелгән был тәҡдимдәр бойондороҡһоҙлоҡ декларацияһында һәм хоҡуҡтар тураһындағы Билләлә каҙаланып ҡалған демократик принциптарҙы юҡҡа сығарыу маҡсатында ике партияның енәйәтсе заговорын асалар... Был тәҡдимдәр профсоюздарҙы бөтөрөүгә йүнәлтелгәндәр һәм профсоюздарҙы ингәтеүсе Тафта-Хартли законынан күп тапҡырҙар уҙып китәләр. Хеҙмәт хаҡын күтәреү өсөн көрәш һәм забастовкалар промышленностең телгә ҡайһы тармағында законһыҙ тип иғлан ителеү ихтималы бар».

Закон проекты ҡабул ителә ҡалған ваҡытта реакцион тышҡы йәки эске политикаға ҡаршы һәр төрлө оппозиция уголовный тәртиптә тикшерелергә тейеш буласаҡ. Белдереү, «хатта Уоллес етәкселегендәге яңы халыҡ партияһының да үҙенең һайлау алды эшендә ныҡ рәүештә сикләнеү йәки хатта тыйылыу ихтималы бар», тип күрһәтә.

Америка компартияһының милли комитете иҫәпләнмәү һүҙе итеп, бөтә демократик деятелдәрҙе һәм ойошмаларҙы контрестән тәҡдим ителгән закон проектын ҡабул итмәүен талап итергә саҡыра.

Рим өҫтөндә Америка авиацияһының демонстрацияһы

Италия парламентенә һайлауҙарҙың йомғағына йоғонтоно көсәйтеү өсөн яңы ынтылыш

РИМ, 14 апрель. (ТАСС). «Мессаджеро» газетаһы Американың бөгөн Көнбайыш Германия аэродромдарына инеүсе «үтә көсле осоусы крепостәре» эскадрельялары алдағы йәкшәмбелә (18 апрелдә һайлауҙар көнө) яҡын-көнсығышҡа осҡанда Италия территорияһы өҫтөнән үтәсәктәр, тип хәбәр итә. Атап әйткәндә, был көндә бомбардировщиктар эскадрильялары Рим ҡалаһы өҫтөндә күренәсәк. Хәбәрсе «был осоуҙы ойоштороу АҠШ-тың оборона министре Форрестолдең инициативаһы, ул үҙенә АҠШ-тың үҙ ваҡытында үҙ политикаһын ҡорал көсө менән яҡлай аласағына ышанмай ҡараусыларға демонстрация яһап күрһәтеү маҡсатын ҡуйғайны» тип күрһәтә.

АҠШ-тың һәм Англияның хәрби караптары Венецияла

РИМ, 14 апрель. (ТАСС). АҠШ-тың һәм Англияның хәрби караптары Венеция Лагунына тупланғанлығы беленде. Бында 9 апрелдән алып Англия миноносецы «Р—90 Чевиэт» һәм Американың 850-се номерле миноносецы якорҙа торалар. Шулай уҡ 10 апрелдә кис Англияның авианосецы «Трайэмф» Лагунаға инде.

Венеция һыуҙарында, үҙған айҙа 830-сы һәм 831-се номерле Америка миноносецтәренең тороуы тураһында тыныс ҡына ҡалыусы Италия матбуғаты, хәҙерге көндә лә тыныслыҡ һаҡлауын дауам иттергәнен әйтеп үтергә кәрәк.

Колумбиялағы хәлгә ҡарата

НЬЮ-ЙОРК, 15 апрель. (ТАСС). Ассошиэйтед Пресс агентствоһының хәбәрсеһе Боготанан «Эль Либераль» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Колумбияның яңы сит ил эштәре министре Анхель Сулета, Колумбия хөкүмәте Советтәр Союзы менән мөнәсәбаттәрҙе өҙеүгә ҡарата бер ниндәй ҙә ҡарар ҡабул итмәне, тип белдергән, тип хәбәр итә. Сулета, хөкүмәт радио станцияһының Советтәр Союзы менән мөнәсәбәттәрҙең өҙөлөүе тураһында иғлан итеүсе консерватив директоры үҙенең посынан алынды, тип хәбәр иткән. Милли радионың директоры итеп Альфон Со Араухо билдәләнгән.

Балаларҙың һаулығы, таҙалығы өсөн

Сөгәлдәрҙә иркенләп ятҡан киләгәйлә тәҙрәнән инеүсе хәйет нурҙарының яҡтылығында, шат йөҙлө аналарҙың бәйләнеп алынмыштарҙан мыҫал бала ятағынан аңсат... (кроваттарҙа һалынып ятҡан балалар)... Клара Батырбаева...

...

Ғ. Әхмәти текст. В. Жданов фотоһы.

Классик әҫәрҙәр

Көгиҙән Башкортостан булексәһе әргәнендә марксизм-ленинизм классиктәренең һәм әҙәбиәт классиктәренең һайланма әҫәрҙәренә, төрлө һүҙлектәргә, альбомдарға подписка йыйнау һәм килгән китаптарҙы подписчиктарға таратыу булеге эшләй.

Был булек тарафынан 1947 йылда һәм 1948 йылдың беренсе кварталында 38 төрлө әҫәргә 14.454 кешенән подписка алынған. Шулар эсендә: В. И. Ленин, И. В. Сталин әҫәрҙәре, Горький, Салтыков-Щедрин, Добролюбов, Серафимович, Мопассан, Малышкин, Маяковский, Дарвин, Чехов, Крылов, А. Толстой, Шишков, Лермонтов һәм башҡа рус һәм сит ил классиктәренең әҫәрҙәре бар.

Шул ваҡыт эсендә 33 төрлө әҫәр буйынса 92.356 дана китап килде һәм подписчиктарға таратылды. Шуларҙан: В. И. Ленин әҫәрҙәре 48623, И. В. Сталин әҫәрҙәре 30891 дана.

Оҙаҡламай Ушаковтың «Аңлатма һүҙлеге», Некрасов һәм Ушинскийҙәрҙең һайланма әҫәрҙәре һәм СССР тарихе альбомы килеүе көтелә.

СССР Прокуратураһында

Һуңғы көндәрҙә прокуратура органдары тарафынан ҡайһы бер промышленность предприятиеларында етәкселәрҙең предприятиелардан сығарылған продукцияның сифатына яуаплыһыҙ ҡарау фактылары тикшерелде.

Насар сифатлы йәки комплекһыҙ продукциялар, шулай уҡ нормаларға, стандарттарға йәки техник шарттарға тап килмәгән продукция сығарыу өсөн СССР Верховный Советы Президиумының 1940 йыл 10 июлдәге Указына ярашлы был Указға ҡарата прокуратура органдары тарафынан промышленностең төрлө тармаҡтарында ҡайһы бер промышленность предприятиеларының, шулай уҡ промкооперация предприятиеларының етәкселәренә ҡарата хөкөм эше ҡуҙғатылды. Мәҫәлән:

Урындағы промышленность Министрствоһының Гродно өлкәһендәге заводының баш инженеры И. К. Выхото систематик рәүештә насар сифатлы велосипедтар эшләп сығарғаны өсөн хөкөмгә тартылды. Выхото биш йылға иркенән мәхрүм ителде.

СССР-ҙың Көнсығыштағы күмер промышленносе Министрствоһының Иркутск өлкәһендәге «Черемховуголь» трестының Храмцовск рудникы техник-контроль бүлеге начальнигы Комиссарчук, һәм шул бүлеге начальнигы Сухомлин, яуаплыһыҙ ... насар сифатлы күмер ... Комиссарчук һәм Сукомел һәр ҡайһыһы 6-шар йылға, Хохлов 5 йылға иркенән мәхрүм ителделәр.

Ленинградтағы урындағы промышленность ... фабрикаһының директоры ... насар сифатлы ... иркенән мәхрүм ителде.

Чкалов өлкәһендәге Тоцк ... сифатлы ... 5 йылға иркенән мәхрүм ителде.

Былардан башҡа, Мәскәү ... фабрикаһының директоры Яшунин, ... бүлеге начальнигы Никитин насар сифатлы ... сығарғандары өсөн, шулай уҡ башҡа предприятиеларҙың ... хөкөмгә тартылдылар.

СССР-ҙың генераль прокуроры иптәш Сафонов СССР Верховный Советы Президиумының 1940 йыл 10 июлдә сығарған Указының ... предприятиеларҙың етәкселәренән сифатлы продукция сығарыу тураһында ... ҡаты күҙәтеү алып барыу тураһында бөтә прокуратура органдарына күрһәтмә бирҙе.

ШАХМАТ

Ботвинник һаман беренсе урында

Шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн матч-турнирҙың 13-сө турында уйналған партиялар һөҙөмтәһе: ... Ботвинник 9 очко, Смыслов 7 очко, Керес 5,5 ... Эйве 2,5 ... очко йыйғы.

Керес менән Смыслов уйны ... партия ... Эйве менән ... ҡалды.

Шулай итеп, 12 турҙан һуң Ботвинник һаман беренсе урында бара: 9 ... Смыслов 7, ... Решевский 5,5 ... Эйве 1.5 очко ...

Н. Зубарев, спортсмен ...

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — «БЕЛУГИНДЕН ӨЙЛӘНЕҮЕ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Башгосфилармонияла — театрҙары артистәре ҡатнашлығы менән эстрада концерты. Кискке 9 сәғәттә башлана.

«Октябрь» — «СЕБЕР ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта» — «ЧАПАЕВ».

Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».

Совет халкының бөйөк йырсыһы

(В. В. Маяковскийҙең үлеүенә 18 йыл тулыу айҡанлы)

Партия әҙәбиәтте беҙҙең бөйөк көрәштең иң алдынғы ут һыҙығына ҡуйҙы; уның тылда, икенсе эшелонда барырға хаҡы юҡ. Совет әҙәбиәте — коммунизм обществоһы төҙөүҙә яңынан-яңы крепостарҙы алыу өсөн һөжүм алып барыусы совет халҡының иң алдында — юлды яҡтыртып, таҙартып барырға тейеш. Әҙәбиәт — бер кешенең йәки бер төркөм кешенең шәхси эше генә түгел, ул — бөтә халыҡ эше, партия эше, государство әһәмиәтенә эйә булған эш. Шуға күрә әҙәби әҫәр — тыныс кабинетта түгел, ә миллионлаған хеҙмәт кешеләренең хеҙмәт практикаһында — көрәш яланында тыуырға тейеш.

«Беҙҙең совет эпохаһының иң талантлы шағиры» (И. Сталин) Владимир Владимирович Маяковский үҙенең бөтә тормошо, бөтә ижады — үлмәҫ шиғырҙарының һәр бер юлы менән быны ошоно дөрөҫләне. Маяковский — был һүҙҙең иң тулы һәм юғары мәғәнәһендә — классик совет шағиры.

Боевой гражданлыҡ поэзияһы Маяковскийҙең байрағы булды. Ул яңы, социалистик лириканың, политик поэзияның нигеҙ һалыусыһы ла, уны иң юғары бейеклеккә күтәреүсе лә булды.

Маяковский, гениаль рус халҡының бөйөк яҙыусыһы А. М. Горький менән бергә, социалистик реализм методын ижад итте, нигеҙләне. Ул социалистик эстетиканы эшләп сығарыусы, уның иң гүзәл өлгөләрен биреүсе булды. Матурлыҡ — ҡаманлы ҡулдарҙа, шыҙтырап аҡҡан шишмәләрҙә, кәккүк ҡысҡырыуында, таң алдынан байраған һауаҫ йырында ғына түгел, иң ҙур матурлыҡ — көрәштә, хеҙмәт процесында, өңөүҙә, тине ул. Һәм ул шул эстетиканы миллионлаған массаларҙа тәрбиәләне.

Я
  всю свою
      звонкую силу поэта
  тебе
    отдаю,
      атакующий класс. —

тине Маяковский, шағир-патриот, шағир-көрәшсе, шағир-төҙөүсе. Был — уның йәшәү һәм ижад девизе ине.

Маяковский үҙенең шиғри хеҙмәтен беҙҙең социалистик төҙөлештең теләһә ниндәй тармағы менән тиңләштерҙе. Шуға күрә беҙҙең социалистик хужалыҡта һәр бер эш план буйынса башҡарылған һымаҡ, әҙәби әҫәрҙәр ҙә социаль заказ буйынса яҙылырға тейеш тине һәм ул шулай эшләне лә. Был уның ижадының иң характерлы яҡы, миненсә.

Ҡайһы бер әҙәбиәтселәр социаль заказ, тигән һүҙҙә бик тар мәғәнәлә — газеталарҙың теге йәки был кампания буйынса биргән заказы, тип кенә аңлайҙар. Был төбөнән хата фекер. Былай уйлау — әҙәбиәттең ролен юҡҡа сығарыу, әҙәби хеҙмәтте ҙур мастерлек талап иткән эштән ваҡ һөнәрселеккә ҡайтарып ҡалдырыу. Маяковский өйрәтеүенсә, социаль заказ — партиялы, халыҡсан, халыҡтың көрәшенә булышла торған әҫәрҙәр яҙыу, тигән һүҙ. Ул быны үҙенең әҙәби әҫәрҙәрендә лә, бик күп сығыш, мәҡәләләрендә лә шулай аңлатты.

«Минең ҡарашымса иң яҡшы шиғри әҫәр — социаль заказ буйынса яҙылған, ... пролетариаттың еңеүенә йүнәлдерелгән, яңы, үткер һәм бөтә кешеләргә лә аңлашыла торған һүҙҙәр менән бирелгән әҫәр була» — тине Маяковский. Һәм әҙәбиәтте политиканан — көрәштән айырырға, ситләтергә маташыусыларға ҡаршы аяуһыҙ көрәште. «Социаль заказды дөрөҫ аңлау өсөн шағир эштәрҙең һәм ваҡиғаларҙың үҙәгендә булырға тейеш. Социаль заказды иң яҡшы рәүештә үтәү өсөн синыфтың алдынғы кешеһе булырға кәрәк, бөтә фронттарҙа ла синыф менән бергә көрәш алып барырға кәрәк. Аполитик искусство тураһындағы әкиәтте селпәрәмә ҡыйратырға кәрәк» тине ул.

В. В. Маяковский Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы тураһында («Хорошо» поэмаһы), беҙҙең еңелмәҫ совет халҡы, уның берҙәмлеге, ойошҡанлығы һәм ғәйрәте тураһында («150.000.000»), Ленин тураһында тиңе булмаған художестволы юғарылыҡындағы тәрән идеялы киң полотнолар тыуҙырҙы. Шул уҡ ваҡытта ул әҙәбиәтте беҙҙең көндәлек тормоштоң оло һәм кескәй проблемаларын хәл итеүсе көслө ҡоралға әйләндереүгә саҡырҙы һәм ул үҙенең бөтә ижады менән оҫтаныҡ әҙәбиәтте тыуҙырыуҙың ысын өлгөһөн күрһәтте. Маяковский халыҡ-ара хәлдәргә һәм беҙҙең илдең эске тормошында булып үткән әҙәмы-күҙәмле әһәмиәте булған ваҡиғаларға шиғри отклик яһамай ҡалмаһы.

«Беҙ бөгөнгө көндөн уларҙан бик ҡараклы һәм мөһим проблемаларҙы белеп, — тине ул. — ә шағирҙар ҡайҙа? Шайтанымы киткәндәрме. Ҡайҙа был шағирҙар? Бер газетала ла юҡ-улар... Әйтергә тейешбеҙ, беҙҙең әҙәбиәт бүтән эстетствоға сумған, үҙ-үҙен аңлатыу, үҙ йәненең лирик эсталеген табыу юлында эҙләнеп, әҙәбиәтте иң мөһим әһәмиәтен:

беҙҙең социалистик төҙөлеш фронтының актив бойецы булыуҙан актив работнигы булыуҙан айырылды». Был телмәрен тамамлап: «Мин ысын поэзия өсөн, бөгөнгө яҙыусының социалистик төҙөлештең актив ҡатнашсыһы булыуы өсөн көрәшеүселәрҙе актив рәүештә яҡлауҙы талап итәм» — тине.

Билдәле булыуынса, Маяковский һәр төрлө хужалыҡ, культура төҙөлеше темаларына бик күп һанда агиткалар яҙҙы. Ул ваҡыттағы «академик» әҙәбиәтселәр уның был ғәйәт файҙалы хеҙмәтенең әһәмиәтен юҡҡа сығарырға, «был шиғыр түгел, был — халтура» тип иҫбат итергә тырыштылар. Бындай ҡараштар, ҡыҙғаныстаҡ ҡаршы, ҡайһы бер әҙәбиәтселәр араһында бөгөнгө көнгә тиклем йәшәп килделәр. Ләкин Маяковский теләһә ниндәй «кескәй темаға» яҙылған шиғырҙы ла «ысынлап, халтураһыҙ һәм уның әһәмиәтен аңлы рәүештә түбәнәйтмәй эшләргә» саҡырҙы.

Ни өсөн мин Маяның Петяға булған мөхәббәте тураһында яҙырға тейеш, ә үҙемде тормош төҙөүсе государство органының бер өлөшө итеп ҡарамаҫҡа тейешмен? ...Бәрәс йәнә һымаҡ беҙҙә еҫ үҫтереп йөрөүсе һәм лирик мөхәббәт темаларына бәйләп йөрөүсе кеше шағир булмай, ә кем беҙҙең киңәйеп килгән синфи көрәштә үҙенең ҡәләмен пролетариатты ҡоралландырыу арсеналына бирә, кем һис бер төрлө ҡара эштән, революция тураһындағы, халыҡ хужалығын төҙөү тураһындағы темаларҙан сирҡанмай һәм теләһә ниндәй хужалыҡ мәсьәләһе буйынса шиғыр яҙа — шул шағир була».

Ләкин Маяковский «факттарҙы рифмаға әйләндереүгә» ҡаршы булды. Ул өҫтән ҡарағанда бик кескәй булып күренгән темаға ла «Ысынлап, халтураһыҙ эшләнгән» «ҙур поэзия» бейеклегенән килде.

Маяковский кабинетта ултырып шиғыр ижад итмәне. Ул һәр ваҡыт алға өҫтөндә, юлда — тормошта, уның үҙәгендә булды. Ул ғүмеренең һуңғы өс йылында СССР ҡалаларында ике йөҙҙән артыҡ әҙәби кисә үткәрҙе. Уның иҫәбе буйынса, йылына уны, уртаса, 60.000 кеше тыңлаған. Был йөрөүҙәр, бер яҡтан, халыҡ араһында агитация һәм пропаганда ролен уйнаһалар, икенсе яҡтан, шағирҙың үҙенә тормошто күрергә, унан өйрәнергә, тормошҡа инергә — массаларҙың социалистик төҙөлеш буйынса алып барған ҙур көрәшенең алғы сигендә булырға ярҙам итте. Ысынан да, уның күнселек әҫәрҙәре үҙенең йөрөгән ваҡытында күргән, күҙәткән ваҡиғаларҙы дөйөмләштереп биреү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килделәр.

Маяковский туҡтауһыҙ һәм күп эшләне. Ул үҙен шиғыр эшләп сығарыусы завод, тип атаны һәм завод эштән туҡтамаған кеүек, шағирҙың да эшмәй торорға хаҡы юҡ, тип һананы. «Ял итергә беҙҙең ваҡыт юҡ, ҡәләм менән һәр көн туҡтауһыҙ эшләргә кәрәк... Әйсе аудитория алдында шағир фәҡәт шулай ныҡышмалы эш менән генә күрһәтергә тейеш үҙен» — тине ул. Онотҡанда бер шиғыр яҙып йәшәүсе шағирҙарҙы прогул яһаусы, тип иҫәпләне Маяковский.

Маяковский беҙгә «күберәк яҡшы һәм төрлө шағирҙар» кәрәк, тине. Ул үҙенең шиғыр алымдарын бер шағирға ла көсләп тағырға теләмәне. Беҙгә бөгөн дә яҡшы һәм төрлө шағирҙар кәрәк. «Маяковскийса», яҙыу һис кем өсөн мәжбүри шарт түгел. Ләкин «совет эпохаһының иң талантлы шағиренең» традицияларын өйрәнеү, үҙләштереү, уларҙы дауам иттереү — һәр бер совет шағиренең бурысы һәм намыҫ эше. Сөнки Маяковский партия тарафынан совет әҙәбиәте алдына ҡуйылған талаптарҙы өлгөлө үтәгән классик шағир булды һәм бөгөн дә шулай булып ҡала.

Ғәйнан Әмири.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П01654 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 78
18
апрель
йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

1948 йылға коллектив договорҙар төҙөү йомғаҡтары тураһында ВЦСПС-та кәңәшмә. (1-се бит).

Беҙҙең республикала. (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Федотов. — Партия ойошмаһы МТС-тың яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән ҡаршылауға өлгәште. (2-се бит).

Редакцияға хат. (2-се бит).

Ужым сәсеүлектәрен ашыҡландырыуҙы көндән-көн киңерәк йәйелдерергә! Б. Сафин.—Ғафури исемендәге колхозда. Х. Хәсәнов. — Сәсеүҙе яҡшы әҙерлек менән ҡаршылайбыҙ. (2-се бит).

КОЛХОЗ АУЫЛЫНЫҢ АЛДЫНҒЫ КЕШЕЛӘРЕ. Х. Ҡолмөхәмәтов. — Оҫта ойоштороусы. (2-се бит).

Совет әҙәбиәте күтәрелештә. (3-сө бит).

А. Шатилов.—Халыҡ-ара күҙәтеү. (4-се бит).

Хеҙмәткә өйрәнеп, үҫәләр. (4-се бит).

Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметергә, накоплениене арттырырға

Промышленноста продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, социалистик накоплениене арттырыу мәсьәләләре һуғыштан һуңғы яңы биш йыллыҡ планда үҙәк бурыстарҙың береһе итеп ҡуйылған. Халыҡ хужалығын үҫтереү, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күрешен яҡшыртыу бурыстары шуны талап итә.

Большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте промышленность тауарҙарына һәм азыҡ-түлеккә хаҡ һәм коммерческий хаҡтарҙы бөтөрөп, берҙәм хаҡ булдырҙылар һәм был хаҡтар кәметелә бара. Продукция эшләп сығарыуҙы арттырыу, уның сифатын яҡшыртыу, үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, экономия өсөн көрәш нигеҙендә социалистик накоплениеләрҙе өҙлөкһөҙ арттырыу, — был мөһим сараларҙы тормошҡа ашырыуға мөмкинлек бирҙе.

Беҙҙең республикабыҙҙың айырым промышленность тармаҡтарында һәм предприятиеләрҙә продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм накоплениеләрҙе арттырыу эшендә күренекле уңыштар бар. Нефтселәрҙең батыр хеҙмәте үҙған йылда сығарылған һәр тонна нефттең үҙенә төшөү хаҡын 6,3 процентҡа кәметеүҙе тәьмин итте. Черниковск нефть эшкәртеү заводы коллективы ағымдағы йылдың тәүге кварталында продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм башҡа төрлө күп саралар үткәреү һөҙөмтәһендә 10 миллион һум күләмендә файҙа алды.

Тау оборудованиеләре, «Автотрактородеталь», Благовещендәге нефть оборудованиеләре заводтарында һәм башҡа байтаҡ предприятиеләрҙә лә күрһәткестәр насар түгел.

Социалистик ярышты киң йәйелдереү, алдынғы методтарҙы ҡулланыу, оборудованиеләрҙе тулы ҡеүәтендә һәм рациональ файҙаланыу, материалдарға, сырьеға экономия яһау өсөн большевистик ныҡышмалы көрәш — социалистик накоплениене арттырыуҙа мөһим сығанаҡ булып тора. Һәм алдынғылар шулай эшләүҙе закон итеп ҡуйғандар ҙа.

Ләкин республикабыҙ промышленносеның айырым тармаҡтарында һәм күп кенә предприятиеләрҙә накоплениене арттырыу өсөн көрәш тейешле юғарылыҡта түгел әле. Был серьез етешһеҙлек яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында Башҡортостан промышленносеның [illegible]

ләнгәндән 13,3 процентҡа ҡиммәтерәк булды. Шуның арҡаһында 2 миллион 238 мең һум зарар күрелде. Авариялар, вышкалар төҙөү эшендәге серьез етешһеҙлектәр, оборудованиеләр менән ваҡытында тәьмин ителмәү арҡаһында килеп тыуған буш тороуҙар һәм бораулау тиҙлегенең бик түбән булыуы бораулау эштәренең ҡиммәт булыуына килтерә.

Металлургтар, Өфөләге кабель, Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводтары коллективтары ла рентабелле эшләүҙе тәьмин итмәнеләр.

Күп төҙөлөш объекттары план менән билдәләнгән хаҡтан юғары булалар, а айырым урындарҙа төҙөлөш эштәренә ебәрелгән государство средстволары хужалыҡһыҙ тотола. Октябрьск ҡалаһындағы Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһы етәкселәренең эште рациональ ойоштора белмәүҙәре, хужаһыҙлыҡ күрһәтеүҙәре арҡаһында үҙған йылда ғына государствоға 18 миллион һум зарар килтерелде. Бындай күренештәргә ҡырҡа сик ҡуйырға кәрәк. Капиталь төҙөлештәргә ебәрелгән средстволарҙы ҡаҡлау, бүлгеләү практикаһы бөтөрөлөргә, төп иғтибар беренсе нәүбәттә тамамланыуға билдәләнгән объекттарға тупланырға тейеш. Төҙөлештәрҙә бөтә эске ресурстарҙы мобилизовать итергә, механизацияны киң файҙаланырға кәрәк.

Мәскәүҙең алдынғы предприятиеләре өлгөһендә республикабыҙҙың күп предприятиеләре государствонан дотация алмай эшләргә, социалистик накоплениене арттырырға йөкләмә алдылар. Шуға айҡанлы заводтарҙа, фабрикаларҙа технологияны камиллаштырыу, сырье һәм материалдарға экономия яһау, бракты кәметеү кеүек мөһим мәсьәләләрҙе эсенә алған ойоштороу-техник саралар планы төҙөлдө. Уларҙы әҙмә-әҙ тормошҡа ашырыу өсөн большевистик ныҡышмалы көрәш ойошторорға кәрәк.

Бөтә совет халҡы кеүек, Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты көсләрәк йәйелдерә баралар. Ярыш йөкләмәләрен бөтә күрһәткестәр, шул иҫәптән продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм социалистик накоплениене арттырыу күрһәткестәре буйынса үтәү мөһим бурыс булып торорға

— Беҙҙең республикала —

Яңы йорттар төҙөлә

Өфөлә яңы торлаҡ йорттары һәм административ-хужалыҡ биналары төҙөү башланды. Агрегат, телефон аппараттары, электротехника заводтары эшселәре өсөн 7500 квадрат метр майҙанда яңы торлаҡ йорттары төҙөү эштәре бара.

Статистик техникум өсөн 3820 квадрат метр майҙанда уҡыу бинаһы төҙөлә.

Нефтселәрҙең һаулығын һаҡлау тураһында хәстәрлек

Көнсығыш райондарындағы нефтселәр союзының Үҙәк Комитеты быйыл Башҡортостан нефтселәрен курорттарға, ял йорттарына ебәреү өсөн бер миллион 100 мең һум аҡса бүлде.

Ағымдағы йылда Союз һәм республика әһәмиәтендәге курорттарға 760 кеше, санаторийҙарға һәм ял йорттарына 1455 кеше ебәреләсәк. Шул йылдың май айында «Башнефть» берекмәһе Стәрлетамаҡта 300 кешелек, Черниковскиҙа 30 кешелек ял йорттары асасаҡ.

Телефон һәм радио селтәрҙәре киңәйә

Башҡортостан связь управлениеһе ауыл Советтарын һәм колхоздарҙы радиолаштырыу һәм телефонлаштырыу буйынса ҙур эштәр алып бара. Радиолаштырыуҙың йыллыҡ планы I кварталда 67 процентҡа үтәлгән. Шул йылдың ес айы эсендә 2675 радиоточка ҡуйылған.

Шишмә, Әлшәй, Матрай һәм башҡа райондарҙа ун ауыл Советы һәм 43 колхоз телефонлаштырылды. Бынан башҡа, республиканың 35 колхозында эске телефон бәйләнеше булдырылды. Шуның менән бергә, Һаҡмар совхозында ошо көндәрҙә телефон үткәреү тамамланды. Аит, Ҡалмаш һәм Ново-Петровск МТС-тарында телефон үткәреү эштәре ҡыҙыу темп менән алып барыла. Хәҙерге көндә Белорет ҡалаһында телефон станцияһын йыһазландырыу эштәре башланды. Ошо көндәрҙә Тирләндә ҙур коммутатор ҡуйыласаҡ.

Покровка, Матрай, Бөрйән, Тәтешле, Ҡандра, Иәрмәкәй һәм башҡа райондарҙа эшләп килгән коммутаторҙарҙың ҡеүәте арттырыласаҡ. Бәләбәй, Дәүләкән һәм Әлшәй райондары араһында телефон бәйләнеше булдырыу эштәре алып барыла.

Предприятиеләрҙә май алды ярышы

Стахановсы вахтала

Тимер юлдың Өфө бүлексәһенең иң ҙур предприятиеләренән береһе булған Дим тимер юл узелы коллективтары беренсе майҙы хеҙмәттә яңы уңыштар менән билдәләргә әҙерләнәләр. Депоның алдынғы ремонтсылары һәм паровозсылары ремонтты тиҙләтәләр. Котельщик Тичков һәм Абросимов иптәштәр торбаларҙы алмаштырыуҙы һәм уларҙы нығыта барыуҙы билдәләнгән сроктан икеләтә йылдамыраҡ тамамлайҙар. Кадровый эшсе Кукса паровоз ҡаҙандарының болттарын һәм ҡалайҙарын бик оҫта алмаштырып, нормаһын икеләтә арттырып үтәй.

Механик цехтың токарҙары, фрезеровщиктары һәм башҡа эшселәре стахановсы вахтаға баҫтылар. Токарь Әюпов һәм уның алмашсыһы Яковлев деталдәрҙе яҡшы эшкәртеү менән бергә, уларҙы монтажлау цехына срогынан алда өлгөртөп тапшыралар. Күтәртеү цехының коллективы беренсе майға бүләк итеп пландан тыш бер паровоз сығарырға әҙерләнә. Бында слесарҙар Живновский, Ивакин, Глущенко, Усов һәм башҡа иптәштәрҙең эш көндәре бер ярым-икешәр норма биреү менән билдәләнә.

Дим станцияһында алдынғылар сафында иң яҡшы маневровый диспетчер иптәш Елизаров сменаһы бара. Смена үҙенең фиҙакәр хеҙмәте менән поездарҙы тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп төҙөүҙе тәьмин итә.

Күмер складының коллективы паровоздарға күмер биреп тороуҙы байтаҡ тиҙләтте. Күмер бирә торған крандарҙа эшләүсе машинистар Чернов һәм Перевозчиков хеҙмәт етештереүсәнлеген икеләтә күтәрҙеләр.

М. Левитин.

* * *

Черниковск машиналар төҙөү заводының бөтә цехтарында ла комсомолец-йәштәр бригадалары почетлы стахановсы вахталарын алып баралар. Улар байрам хөрмәтенә гүзәл эш өлгөләре күрһәтәләр. Биненсе цехта иптәш Вазин етәкселегендәге комсомолец-йәштәр бригадаһы көндәлек производство заданиеларен 170, иптәш Суриков етәкселегендәге бригада 200 процентҡа тиклем еткереп үтәйҙәр.

Өсөнсө цехтың фрезеровщигы Шилов, токарь Петров, 4 станокты хеҙмәтләндереүсе йәш эшсе Мурашев, 19-сы цехтың токаре, комсомолец Валиев иптәштәр тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәр бирәләр.

Тәүлеккә 24 мең кирбес

Директоры иптәш Волынец булған кирбес заводы эшселәр коллективы май алды социалистик ярышына ҡушылып, тәүлегенә 24-мең дана кирбес, 15 тонна эзбиз, 24 тонна гипс етештереү йөкләмәһе алғайны. Коллектив биргән вәғәҙәһендә тора. Тәүлегенә 24-әр мең дана кирбес сығарыла.

Начальниктары Әсәдуллин, Колобов иптәштәр булған цехтарҙың стахановсылары Яровикова, таш ваҡлаусы Рыков, мотористка Боброва, бушатыусылар Мөфтиева, Иванова, Афанасьевалар бер ярым-икешәр норма бирәләр.

Нормалар арттырып үтәлә

Телефон аппараттары заводы коллективы артта ҡалып килеүселәр сафынан сығып, тәүге квартал планын арттырып үтәне һәм май алды социалистик ярышҡа ҡушылып, байрам көненә дүрт айлыҡ планды 115 процентҡа үтәргә йөкләмә алды.

Хәҙер йөкләмәне үтәү өсөн ныҡышмалы көрәш бара, стахановсылар һаны арта. Стахановсы фрезеровщик Вәлиуллина, столяр Козьмодиянский, слесарь Александров, Зарипова, Мостаев, Хәбибова, Аҡбулатова һәм башҡа күп кенә иптәштәр смена һайын бер ярым-ике норма бирәләр. Элек нормаларын үтәй алмаған Поскрякова, Львова, Суркова, Аблеев иптәштәр май алды ярышында нормаларҙы арттырып үтәүселәр сафына сыҡтылар.

И. Бикметов.

Шырпы фабрикаһында

Беренсе май исемендәге шырпы фабрикаһының коллективы бөтә халыҡ байрамын производство уңыштары менән ҡаршылау өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙе. Автомат һәм йыйнау цехтары темпты әлеккә-әле үҫтерә һәм продукцияның сифатын яҡшырта барып, ярышта алдынғылар сафына сыҡтылар. Автомат цехының стахановсылары Ветлакова, Киреев, йыйнау цехында Лунева, Матвеева иптәштәр көндәлек нормаларын 130 проценттан арттырып үтәйҙәр.

Коллектив үҙенең көсөн биш йыллыҡты дүрт йылда тамамлауға туплай.

В. Памирский.

Балаларҙың үҙешмәкәрлек түңәрәге байрамға әҙерләнә

ЧЕРНИКОВСК. «Ударник» клубы эргәһендә ойошторолған балалар үҙешмәкәрлек түңәрәге 1 Май байрамына ныҡлы әҙерлек алып бара.

Бейеү коллективы Крыловтың «Сиңерткә һәм ҡырмыҫҡа» басняһы буйынса балет номеры һәм халыҡ бейеүҙәре, акробатик түңәрәк ҡыҙыҡлы акробатик һәм физкультура номерҙары әҙерләй. Яңы ойошторолған балалар хоры рус һәм украин йырҙары менән сығыш яһаясаҡ.

Драма түңәрәге коллективы «Батша — Әрмәнде» әкиәте буйынса инсценировка өҫтөндә эшләй. Түңәрәктә ҡатнашыусылар совет шағирҙарының шиғырҙарын уҡыясаҡтар. Фойела радио, фото һәм художестволы сигеү түңәрәктәренең күргәҙмәһе ойошторола. Унда һәләтле балаларҙың иң яҡшы эштәре ҡуйыласаҡ.

Көн дә ике норма

Өфө «Металлист» артеле члендәре 1 май алды социалистик ярышҡа ҡушылып алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр. Артель коллективы беренсе көндән үк көндәлек планды 103—105 процентҡа еткереп үтәй башланы.

Артелдең ҡалай нәмәләр эшләү цехы (начальнигы иптәш Криницин) коллективы цехтар-ара социалистик ярышта алда бара. Цех

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия ойошмаһы МТС-тың яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән ҡаршылауына өлгәште

Приют МТС-ы коллективе үткән ауыл хужалығы йылын ҙур ғына уңыштар менән тамамланы. 15 ат көслө һәр бер трактор менән планда билдәләнгән 530 гектар урынына уртаса 759 гектар ер эшкәртелде. 15 футлы комбайн менән, 135 гектар урынына, 222 гектар урожай йыйналды. Бер гектар ерҙе эшкәртеүҙең үҙенә төшөү хаҡы 4,2 процентҡа кәметелде. Колхоздар менән төҙөлгән договор йөкләмәләре эштең бөтә төрҙәре буйынса ла тулыһы менән үтәлде. Яҡшы эшләгәне өсөн МТС эшселәре коллективе ВКП(б) Өлкә Комитетенең һәм БАССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алды.

МТС-тың тәүге партия ойошмаһы был уңыштарға партия-ойоштороу эштәрен хужалыҡ эштәренә етәкселек менән дөрөҫ бергә тура килтереп алып барыуы һөҙөмтәһендә өлгәште. Партия ойошмаһы был уңыштар менән генә тынысланып ҡалманы. Ул коммунистар, МТС эшселәре коллективын стахановсы яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында алда торған бурыстарҙы уңышлы үтәүгә мобилизовать итте, 1948 йылдың яҙғы баҫыу эштәрендә тракторҙар паркын үткән йылғы менән сағыштырғанда, бер ярым тапҡырға күберәк эшләтеү өсөн көрәште бөтә трактористар алдына конкрет бурыс итеп ҡуйҙы.

Куйбышев өлкәһе ауыл хужалығы механизаторҙарының мөрәжәғәтенә яуап итеп, партия ойошмаһы трактористар, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһында тракторҙарҙы һәм ауыл хужалығы машиналарын ваҡытынан алда һәм яҡшы итеп ремонтлау өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр.

Агитаторҙар ремонт эшселәренә ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы тарафынан ауыл хужалығын күтәреү буйынса алға ҡуйылған бурыстарҙы яҡшылап аңлаттылар. Коммунистар социалистик ярыштың авангардтары булдылар. Ярышта алдынғылыҡты алыусыларҙың эш методтары регуляр рәүештә сығарыла торған стена газеталарында яҡтыртылды, производство кәңәшмәләрендә тикшерелеп, дөйөмләштерелә барҙы. Был бөтә коллектив члендарын алдынғыларҙан өлгө алып эшләргә, хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәттә булырға өйрәтте.

Партия ойошмаһының эшкә дөрөҫ етәкселек итеүе һөҙөмтәһендә МТС коллективе тракторҙарҙы һәм тағылма инвентарҙәрҙе 1 апрелгә тулыһы менән яҡшы сифатлы итеп ремонтланы. Яҙғы баҫыу эштәренә етерлек тиклем яғыулыҡ ташып ҡуйылды. Тракторҙарға ағымдағы ремонт үткәреү өсөн күсмә мастерскойҙар, трактор бригадаларын хеҙмәтләндереү өсөн вагончиктар әҙерләнде. Хәҙер комбайн моторҙарын ремонтлау эше ҡыҙыу темп менән алып барыла. Был эшкә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаты коммунист иптәш Емельянов етәкселек итә.

Партия ойошмаһына МТС производствоһы менән етәкселек итеү эшендә ошо уңыштарға өлгәшеүҙә кадрҙарҙы эшкә дөрөҫ урынлаштырыу ҙа ныҡ ярҙам итте. Унда коммунистарҙың 81 проценте тура-нан-тура производствола эшләй һәм улар эштең иң яуаплы участкаларына ҡуйылғандар. Коммунистарҙан 10 кеше тракторист һәм трактор бригадаларының бригадирҙәре, 6 кеше комбайнер, 6 кеше механик, токарь, шофер булып эшләй. Трактор бригадалары бөтәһе лә трактористар һәм уларҙың ярҙамсылары менән тәъмин ителгәндәр.

Партия ойошмаһы кадрҙарҙы тәрбиәләү эшен яҡшы ойоштороуы менән кадрҙарҙы эштә нығытыуға өлгәште. МТС-тың күренекле работниктәре Ғәләмов, Данилов, Шаманаев, Евсеев, Емельянов, Цыганов иптәштәр унда 10—15 йылдан бирле эшләйҙәр. Улар МТС-ты республикабыҙҙың иң алдынғы машина-трактор станциялары сафына сығарыу өсөн көрәшәләр.

МТС-тың алдынғы трактор бригадаһы бригадиры коммунист иптәш Ғөбәйҙуллин шартлы һәр бер трактор менән быйылғы сезонда 1500 гектар ерҙе яҡшы сифатлы итеп эшкәртергә йөкләмә алды. Уның өлгөһөндә башҡа трактористар ҙа үҙ өҫтәренә ҙур йөкләмәләр алдылар. Был йөкләмәләрҙең тулыһынса үтәлеүендә шик юҡ. Сөнки һәр бер тракторист үҙе яҡшы сифатлы итеп ремонтлаған тракторҙа эшләйәсәк.

С. Федотов,

ВКП(б) Өлкә Комитетының ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге инструкторы.

Түңәрәк эшен тамамлай

ОКТЯБРЬСК. «Туймазынефть» тресы управлениеһе эргәһендә коммунист инженер-техник работниктар өсөн ойошторолған түңәрәк «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсының» һуңғы главаһын өйрәнә. Бынан һуң үтелгән темаларҙы ҡабатлау өсөн бер нисә занятие үткәреләсәк.

Түңәрәк уҡыусыларҙың политик белемдәрен һәм идея кимәлдәрен күтәреү менән бергә, уларҙы китап менән үҙ алдарына эшләргә өйрәтте.

Түңәрәктең үҙ эшен уңышлы тамамлауы өсөн уның етәксеһе, тресттың өлкән геологы иптәш Михайловский күп көс һалды.

Х. Маннанов.

Редакцияға хат

Был тауарҙар ни өсөн үтмәйҙәр?

Мин байтаҡ ваҡыттарҙан бирле Шаран райпотребсоюзының универмагында мөдир булып эшләйем. Бына, ярты йыл инде, магазинда, киндергә оҡшаған һәм бик насар итеп тегелгән ҡыҫҡа пальтолар, ҡыҫҡа еңле ебәк күлдәктәр һатылмайынса ята. Магазинда йыш ҡына ошондай һүҙҙәр була:

— Был пальто күпме тора?

— 561 һум.

— Ниңә ул тиклем ҡиммәт, бик насар бит...

Миңә яуапһыҙ ҡалырға ғына тура килә. Ысынлап та, ул пальтолар һәм күлдәктәр потребителдәрҙе ҡыҙыҡһындырырлыҡ түгелдәр. Миҫалға, Бөрө тегеү фабрикаһы тегеп сығарған ебәк күлдәктәрҙе алайыҡ. Уларҙың сифаты ҡыҫҡа, теләһә ниндәй ... үҙенең хаҡы 376 һум тора. Шулай уҡ, Өфөләге 8 март исемендәге фабрикала тегелгән йөн күлдәктәр ҙә бик насарҙар. Фасондары ярыҡһыҙ, ҡалала һәм ауылда ла кейерлек түгел. Хаҡы 358 һум. Алғас та уны бөтөн ... тегергә, тағы ла аҡса түгергә кәрәк.

Хәҙер яҙ килеп етте. Тиҙҙән баҫыу эштәре башланасаҡ. Шулай булғас, ауылға итектәр, салбарҙар, костюмдар һәм башҡа тауарҙар ебәрелергә тейеш ине, ә улар юҡ. Башҡортостан еңел промышленность һәм сауҙа Министерстволары етәкселәре ауыл потребителдәренең талаптарына серьез ҡарарға — яҡшы сифатлы тауарҙар ебәрергә тейештәр.

Ш. Вәлиуллин.

Газетаға баҫылмаған материалдар эҙенән

Шишмә районы Советы исполкомы эргәһендәге коммуналь хужалыҡ бүлеге мөдире Ардувановтың ... ремонт үткәреүгә билдәләнгән средстволарҙы урынһыҙ тотоуы, ... хужалыҡтар менән етәкселек итмәүе тураһында «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына Ф. Якубенко иптәштән хат килгәйне.

Был мәсьәлә буйынса район Советы исполкомы тарафынан үткәрелгән тикшереү район коммуналь хужалыҡ бүлегендә тағы ла ҙур ғына етешһеҙлектәрҙе асты.

Үҙ вазифаһына яуапһыҙ ҡараусы, государство аҡсаһын үҙләштереүсе Ардуванов хеҙмәт урынынан алынды, ВКП(б) члендарына кандидатлыҡтан да сығарылды һәм хөкөмгә бирелде.

* * *

«Хөкүмәт закондарын боҙған урында тәнҡиткә ҡыҫалар» тигән хәбәр ВКП(б)-ның Күгәрсен райкомы тарафынан тикшерелгән, түбәндәге саралар күрелде:

— «Правда» колхозы председателе Байназаров колхоздың етешһеҙлектәрен ... ... председателектән алынды.

Түҙәт ауыл Советы председателе, коммунист иптәш Хәсәновҡа, үҙ бөлдәге менән Түҙәт ... директорһынан колхоз ... ер биргәне өсөн ВКП(б) райкомы бюроһы тарафынан шелтә бирелде.

Ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыуҙы көндән-көн киңерәк йәйелдерергә!

Ғафури исемендәге колхозда

Ғафури исемендәге колхоз члендәре был көндәрҙә бер генә теләк менән, мул урожай үҫтереп алыу теләге менән йәшәйҙәр. Тимерлектә яңғыраған сүкеш тауыштары, фермала аттарға һәм эш үгеҙҙәренә ойошторолған яҡшы тәрбиә, баҫыуҙарҙа киң күләмдә үткәрелгән агротехник саралар — бөтәһе лә ошо маҡсатҡа йүнәлтелгәндәр.

Колхоз үҙгән йыл көҙ 175 гектар арыш сәсеп ҡалдырҙы. Яҙғы культуралар сәсеү — 254 гектар күләмендә билдәләнгән. Был эштәрҙең бөтәһен дә колхозсылар тик үҙ көстәре менән генә үтәйәсәктәр, сөнки колхозды МТС хеҙмәтләндермәй.

Ҡаты ситуацияларҙа аҡтарғанда улар ауырлыҡтар алдында туҡтап ҡалмайҙар. Мөмкинлектәрҙе киң файҙаланып, колхоз баҫыуҙарында мул урожай үҫтерәләр. Бөтә сәсеүлек өсөн етерлек орлоҡ әҙерләнде. Колхоздың яҙғы сәсеүҙә эшләү өсөн 35 аты, 25 үгеҙе бар. Колхозсылар иртә культуралар сәсеүҙе 7—8 эш көнөндә, ә һуңғы культуралар сәсеүҙе 6 эш көнөндә тамамлауҙы планлаштырҙылар. Бының өсөн эш планы төҙөлдө. Колхозда хеҙмәткә яраҡлы 180 кешенең бөтәһе лә сәсеүҙә ҡатнашасаҡ.

Колхоз председателе иптәш И. М. Халтурин Совет Армияһы сафынан демобилизацияланып ҡайтҡан, энергиялы работник. Председатель яҙғы сәсеү эштәрен үткәреүгә ҙур өмөт менән ҡарай:

— Беренсе ышаныс колхозсыларҙың намыҫлы хеҙмәтендә, — ти ул.

Колхозда 4 бригада һәм уларҙа 13 звено ойошторолдо. Һәр звено составында 12—13 кеше, уларға айырым участкалар бүлеп бирелгән. Сәсеүгә әҙерлектең беренсе көндәренән үк улар ярышып эшләйҙәр, юғары урожай алыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланалар. 4400 йөк тиреҫ сығарыу планы 6 мең йөккә еткерелеп үтәлде. Юламанова Хәбиб звеноһы ғына орлоҡсолоҡ участкаһына бер мең йөк тиреҫ сығарҙы. Ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн байтаҡ көл әҙерләнде.

Башҡорт АССР-ы ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм орденлар, медалдар менән награлдау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указдары колхозсылар тарафынан ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланды. Уларҙы хеҙмәт батырлыҡтарына дәртләндерҙе. Указды өйрәнеүгә арналған йыйылышта, иптәш Ҡадиров етәкселек иткән беренсе бригада колхоздың бөтә бригадаларын ярышҡа саҡырҙы. Колхоз члендәре быйыл арыш урожайын ике, бойҙай урожайын өс тапҡырға арттырыу бурысын ҡуйҙылар.

Звеновод Хәбиб Юламанова:

— Беҙ үҙебеҙгә беркетелгән культураларҙы яҡшы тәрбиәләп үҫтерәсәкбеҙ, бойҙайҙың һәр гектарынан кәмендә 110 бот урожай алырбыҙ,—тине.

Ғилмениса Ғәлиәскәрова, Васила Молокова һәм башҡа иптәштәрҙең звенолары был фекерҙәрҙе берҙәм рәүештә хуплаҡнелар.

Ҙур булмаған Көмәрле ауылы Инйәр йылғаһы буйында, ҡалҡыу ерҙә урынлашҡан. Зәңгәр күктән ҡояш эҫе нурҙарын сәсә. Ауыл өҫтөнә аҡ томан күтәрелә. Инде тау биттәре ҡарҙан асылды. Бер нисә көндән колхозсылар баҫыуға сығасаҡтар. Юғары урожай өсөн көрәш үҙенең яуаплы осорона инә.

Б. Сафин.

Архангель районы.

Сәсеүҙе яҡшы әҙерлек менән ҡаршылайбыҙ

Беҙгә сәсеүгә әҙерлек осоронда күп кенә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға тура килде.

Байтаҡ картуф орлоғо етешмәй ине. Колхозсылар үҙ запастарынан 254 бот картуф биреп, колхоздың орлоҡ фондын тулыландырыуҙа ҙур ярҙам күрһәттеләр.

Звеноларҙың эше ҡайтанан ойошторолдо. Улар менән етәкселек итеүгә эгенселек эшен яҡшы белгән, эш һөйөүсе, инициативалы иптәштәр ҡуйылды. Хәҙер бөтәһе 7 даими звено эшләй. Звено члендәре агротехник түкәрәктә юғары урожай мастерҙарының, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының эш тәжрибәләрен ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр һәм үҙҙәре лә улар кеүек үк юғары урожай алыу өсөн көрәшәләр. Мосаллия Баһауыва етәкселек иткән комсомолец-йәштәр звеноһы яҙғы сәсеүгә әҙерлекте беренсе булып тамамланы. Звено ҡышҡы агротехник саралар планын арттырып үтәне. Хәҙер звенолар ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуға ныҡлы әҙерлек алып баралар. Бының өсөн 70 центнер көл, 10 центнер ҡош тиҙәге һәм башҡа ашламалар йыйналды.

Колхоздың эш аттары 25 марттан ялға ҡуйылдылар. Улар өсөн баҫыу эштәре осоронда 300 центнер бесән әҙерләнде.

Партия ойошмаһы колхозсылар, баҫыусылыҡ бригадалары, звенолар араһында сәсеүгә әҙерлектә социалистик ярышты ойоштороуҙа, агитацион-массовый эште яҡшыртыуҙа ҙур ғына эштәр башҡарҙы. Сәсеү осоронда беҙ бөтә агитацион-массовый эште баҫыуға—һабансылар, тырмасылар, сәсеүселәр һәм трактористар араһына күсерәсәкбеҙ.

Дүртөйлә районы, «Таш йылға» колхозы партия ойошмаһы секретаре.

Х. Хәсәнов,

500 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды

ҠАНДРА. (Телефон аша). Баҫыуҙар ҡарҙан асыла башлау менән үк районның колхозларында ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәре башланды.

«Трактор» ауыл хужалығы артелендә звенолар 40 гектар орлоҡ участкаһында ужым сәсеүлектәренә ашламалар индерҙеләр ҙә инде. Бөтә сәсеүлектәр ҙә тырматыласаҡ. Бының өсөн 54 баш мөгөҙлө эре мал эшкә өйрәтелде. Колхозсылар үҙ һыйырҙары менән 5—6-шар гектар ер тырматырға һүҙ бирҙеләр.

Колхоз партия ойошмаһы (секретаре иптәш Яппаров) коммунистарҙы бригадаларға һәм звеноларға беркетте. Улар баҫыуҙа эшләүсе колхозсылар араһында массовый аңлатыу эштәре алып баралар.

Районның колхоздарында тәүге ике көн эсендә генә 500 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде.

БЕҘ ҘӘ АЛДЫНҒЫЛАР КЕҮЕК ЭШЛӘЙӘСӘКБЕҘ

ЯҢАУЫЛ. Республикабыҙҙың юғары урожай алыусы ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдар менән награлдау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы сығыу айҡанлы районның бөтә колхоздарында ла йыйылыштар уҙғарылды.

«Красный путь» колхозында звеновод Бибй Нуртдинова үҙенең сығышында:

— Партия һәм хөкүмәт беҙҙең республика игенселәренең батыр хеҙмәтен юғары баһаланы, алдынғылар ордендәр һәм медалдар менән наградландылар. Быйыл беҙ ҙә алдынғылар кеүек эшләргә һүҙ бирәбеҙ, — тине.

Икенсе көндә үк звено члендәре үҙ участкаларына өҫтәмә рәүештә тағы ла ашламалар әҙерләүгә башланылар. Бер нисә көн эсендә ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыу өсөн 15 центнер көл, 4 центнер ҡош тиҙәге йыйнаталар.

Н. Мулин.

ХЕҘМӘТ КҮТӘРЕЛЕШЕ

Әлшәй районының «Трудовик» колхозында Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм ордендәр, медалдар менән награлдау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указын өйрәнеү колхозсыларҙы яңы хеҙмәт күтәрелешенә рухландырҙы. Улар Указға яуап итеп, алдынғы мастерҙарҙың эш методтарын колхозда киң ҡулланыуҙы, 1948 йылда юғары урожай үҫтереүҙе бурыс итеп ҡуйҙылар.

Был колхоз баҫыуға сығырға бөгөндән үк әҙер. Бөтә сәсеү майҙанына орлоҡ әҙерләп, хәҙер звенолар ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуға әҙерләнәләр. Уның өсөн ике тонна минераль ашлама, 120 центнер көл һәм ҡош тиҙәге әҙерләнде. Колхоз яҙғы баҫыу эшендә ҡатнаша торған 30 баш атты һәм 50 баш үгеҙҙе ялға ҡуйҙы.

Ғ. Ғайнетдинова.

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Һүрәттә, юғарынан түбәнгә табан: Илья Григорьевич Эренбург, Борис Абрамович Галин (Рогалин), Николай Николаевич Михайлов, Максим Танк (Евгений Иванович Скурко), Август Михкелевич Якобсон, Николай Евгеньевич Вирта, Милица Васильевна Печкина.

Совет әҙәбиәте күтәрелештә

* * *

СССР Яҙыусылар Союзы генеральный секретаре урынбаҫары Вс. Вишневский менән беседа

* * *

Әҙәбиәт өлкәһендә иң күренекле егерме туғыҙ хеҙмәткә Сталин премиялары биреү партиябыҙҙың, хөкүмәтебеҙҙең һәм лично иптәш Сталиндең яҙыусылар һәм уларҙың хеҙмәттәре тураһындағы хәстәрлектең яңы күренеше булып тора.

Беренсе дәрәжәләге премиялар Ватан һуғышы һәм һуғыштан һуңғы беренсе йылдарҙағы беҙҙең халҡыбыҙҙы күрһәткән өс романға бирелгән. Ул — М. Бубенновтың «Аҡ ҡайын», П. Павленконың «Бәхет», И. Эренбургтың «Дауыл» тигән романы.

Бубеннов һуғыш көндәрендә йәш офицер булды, әҙәбиәткә күптән түгел килде. Уның романы асыҡлыҡ һәм тел байлығы менән айырыла. Совет кешеләренең характерҙаре ҡыйыу һәм дөрөҫ көүҙәләндерелгән. Һуғыш утын үткән яҙыусы тормошто тәрән һәм талантлы рәүештә бирә алған.

П. Павленконың «Бәхет» тигән романына общественность тарафынан күп откликтар булды. Романдың төп образы — полковник Воропаев. Был яңыны төҙөүсе коммунист, гражданин образы. Воропаев менән бер рәттән, тыныс осорҙа илде аяҡҡа баҫтырыу процесендә үҙҙәренең урынын тапҡан уңарлаған ябай хеҙмәт кешеләре индерелгәндәр. Роман хәрәкәт, неска эмоциялар менән тулы.

Уйланған пландың ҡыйыулығы, күрһәтелгән картиналарҙың киңлеге, тәбиғәтте тасуирлау, ә иң мөһиме—совет кешеләренең эске донъяһын аса белеү романдың шикһеҙ ҡиммәтлелеге булып тора.

Аҙаҡ килеп, өсенсө роман — И. Эренбургтың «Дауылы». Ул эске яҡтан башта күрһәтелгән ике роман менән тоташҡан кеүек. Үҙенең ҡоласы менән Бубеннов һәм Павленко романдарына ҡарағанда киңерәк. Ваҡиға СССР-ҙа ла, Германияла ла, көрәшеүсе Францияла, «Маки» Францияла ла бара. Эренбург төрлө илдәрҙәге тиҫтәләрсә ябай кешеләрҙең юлын бик нық күҙәткән, кешеләрҙең аңына, эш итеүҙәренә һуғыштың нисек тәьҫир итеүен күрһәткән. Бөтә совет халҡының ныҡышмалы, батырҙарса көрәшенең нисек Европаны һәм бөтә донъяны фашизм иҙеүенән, культураны һәм цивилизацияны һәләкәттән ҡотҡарып алып ҡалыуын яҙыусы йәнле миҫалдар менән аңлата. «Дауыл» романы И. Эренбургтың иң серьез әҫәрҙәренән береһе, тип уйлайым.

Икенсе премия менән билдәләнгән әҫәрҙәрҙән Вера Панованың «Кружилиха» романы бик ҡыҙыҡтырғыс һәм әһәмиәтле булып тора. Был яҙыусыны беҙ барыбыҙ ҙа элек тә Сталин премияһы менән билдәләнгән «Юлдаштар» буйынса беләбеҙ. Яңы әҫәрендә Панова алға ҡыйыу аҙым эшәй. Ул тыл темаһын, һуғыш бөтөр көндәрҙә эшсе Урал темаһын ала. Яҙыусы хәрби завод тирәһенә тупланған ҙур коллективте күрһәтә. Яҙыусы кешеләрҙең күп кенә драмаларын, кешенең шәхси кисерештәрен күрһәтә, общественный һәм шәхси проблемаларҙы бөтә тулылығы менән килтереп баҫтыра. Был романдың биттәрен аҡтарған сағында, уны уҡыусы кешегә күп нәмә тураһында уйланырға мөмкинлек бар. Бөгөнгө көндөң тыны һиҙелә беҙгә. Ҙур күҙәтеүсәнлек, кешеләргә йәнле мөхәббәт менән тулы булған яҙыусының ижади эҙләнештәрен Сталин премияһы достоин билдәләй.

Панованың әҫәре менән бер рәттән Э. Казакевичтең «Йондоҙ» тигән повесен күрһәтеп үтәм. Казакевич — Ватан һуғышына үҙе теләп китеүсе. Ул рядовой һалдаттан башлап, армия штабының разведка начальнигы хеҙмәтенә тиклем булған юлды үтте, Берлинде штурмлауҙа ҡатнашты. «Йондоҙ» тигән повесть — йәш яҙыусы-офицерҙың беренсе әҙәби эше. Һәм әйтергә кәрәк, был бик һирәк осрай торған уҡышлы һынау булды.

Повестең баҫылып сығыуы уҡыусыларҙан күп откликтар һәм хаттар килтерҙе. Общественность яңы яҙыусы өсән, уның ысын, саф әҫәре өсөн тауыш биргән кеүек ине. Һәм беҙ Э. Казакевич исемен яңы лауреаттар исемлегендә күрабеҙ. Хеҙмәт менән ҡаҙанылған награда!

Совет әҙәбиәте уҡыусыларына үҙенең «Бруски» романы буйынса яҡшы таныш булған Федор Панферов та премия менән билдәләнде. Уның «Тыныслыҡ өсөн көрәш» романы фронтты ла, тылды ла һүрәтләй. Романда совет кешеләренең ихтыярын һәм сикһеҙ энергияларын күрһәткән яҡшы һәм хәтерҙә һаҡларлыҡ эпизодтар бар. Шулай уҡ Украинаның йәш яҙыусыһы Александр Гончарҙың «Байраҡ йөрөтөүселәр» тигән романын да күрһәтеп үтәм. Әҫәр романтик тондарҙа, киң быяуҙа, деталдарһеҙ һәм характеристикаларҙы тәрәнәйтмәй, ләкин йәш дәрт менән, хәрәкәтле итеп, һуғышта беҙҙең армиябыҙ кешеләрен белеү менән яҙылған.

Б. Кербабаевтың «Хәл иткес аҙым» тигән романын принципиаль рәүештә яңы ваҡиға тип иҫәпләргә кәрәк. Төрөкмән әҙәбиәтендә быға тиклем Төрөкмәнстанда булмаған жанрҙа беренсе роман тыуҙырылған. Керабабаев Төрөкмәнстанды империалистик һуғыш көндәренән башлап күрһәтә, Октябрҙе, рус, төрөкмән һәм башҡа халыҡтарҙың сит ил интервенттәренә ҡаршы бергәләп көрәшеүҙәрен һүрәтләндерә, роман ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уҡыла, беҙгә элек әҙәбиәтта бер кем тарафынан да күрһәтелмәгән донъяны аса.

«Иван Грозный» трилогияһын тыуҙырыусы рус прозаиге Валентин Костылев та премия менән хөрмәтләнде. Был бик реалистик әҫәр тәрән рәүештә патриотизм менән һуғарылған.

Өсөнсө дәрәжә премия алыусы яҙыусылар араһында бик күп төрлө жанр вәкилдәре бар. Ватан һуғышы көндәрендә Ҡырымда подполье эше менән етәкселек иткән Иван Козлов премия менән билдәләнде. Партияла үткән үҙенең ғүмерендә алты тапҡыр подпольела эшләргә һәм партияның мөһим бурыстарын үтәргә тура килгән ҡарт большевик, әлеге Козловтың яҙмалары һуғыш тураһындағы мемуарҙар араһында, минеңсә, бик ҡиммәтлеләр. Был яҙмалар тулҡынландырғыс хаҡлыҡ менән тулы. Очеркист Борис Галиндең хеҙмәте тейешле баһаланған, ул күп йылдар буйы яҙа ине. Уның һуңғы ваҡытта Донбасс тураһында яҙылған очерктәре оператив, художестволы ижадтың бер төрө булып тора. Был премия бөтә совет журналистәре-очеркистәре отряде өсөн стимул булып хеҙмәт итһен.

Вера Кетлинскаяның «Осадала» тигән романы премия менән билдәләнде. Яҙыусы бөтә көндәрен камалған Ленинградта үткәрҙе. Романда ҡала, заводтар, фронт, ябай кешеләрҙең тормошо сағылдырыла, семья һәм ҙур коллективтәр күрһәтелә. Роман тойолған, уйланылған, баштан кисерелгән ваҡиғалар менән тулы.

Артабан В. Абдеевтең «Көтөүҙәр юлдарҙа» повесен, Т. Керашевтең «Бәхеткә юл» романын, И. Ликстановтың «Кескәй бала» повесен күрһәтеп үтке килә. Ликстанов үҙенең юлын егерменсе йылдарҙа флоттың ябай военкоры булып башланы. Унан һуң ул журналист, Уралда редакция работнигы булды. Журналистиҡа эше аҡрынлап, үҙен әҙәбиәттә юғарыраҡ һынап ҡарауҙарға әйләнде. Һәм бына 25 йыл буйына булған эш, һынауҙар, арымай-талмай үҙенде шымартыу, камиллашеу, тормош тәжрибәләрен туплауҙарҙан һуң — автор Сталин премияһын алырлыҡ китап яҙҙы. Был периферияла, редакцияларҙа, издательстволарҙа эшләүсе башҡа бик күп әҙәбиәтселәребеҙ өсөн ҙур өлгө буласаҡ. Хеҙмәт итергә, эҙләнергә, ныҡышмалы рәүештә, хеҙмәтте һөйөп ижад итергә кәрәк!

Н. Михайловтың «Тыуған ил картаһы өҫтөндә» тигән китабы тураһында әйтмәйенсә мөмкин түгел. Был яңы жанрҙа яҙылған. Был — география китабы, ләкин уның Тыуған ил тураһында шундай ҡыҙыҡһындырырлыҡ, образлы, поэтик күтәренкелектә яҙылыуы арҡаһында, ябай, мәктәп темаһы—поэма, ә урыны менән патриотик йыр кимәленә күтәрелә.

Бер үк ваҡытта йәш шағирҙәр Н. Грибачев һәм А. Недогонов ижадтарының беренсе премия алыуы бик гүзәл нәмә. Улар икеһе лә колхоз темаһына яҙып сыҡтылар. Некрасов һәм Маяковскийҙең юғары традициялары билдәһе аҫтында барған йәш поэзия яңы ижади уңыштар ҡаҙана. Лауреаттарҙың икеһе лә Ватан һуғышында ҡатнашыусылар һәм уларҙың әҫәрҙәрендә лә ауыр көндәрҙең эҙе ҡалған.

Беренсе дәрәжәләге премия Владимир Сосюраға бирелде. Сосюра дары утында көйгән шағир, беренсе ҡыҙылгвардия көндәрендә тыуған, ҡанында ут һаҡлаған шағир. Премияға лайыҡлы булған уның һуңғы китабы, Сосюраның ижади көсөнө, поэзияһының киң үҙәгендә торғанлығын тере күрһәткес булып тора.

Икенсе дәрәжәләге премиялар латыш шағире Я. Судрабкалндың «Туғандаш семьяла» тигән шиғырҙарына, белорус шағире Максим Танктың «Әгәр күрһәләр ине» исемле йыйынтығына һәм таджик шағире Турсун-Заденең Индия тураһындағы гүзәл шиғырҙары өсөн бирелгән. Шағир күптән түгел Индияла булды, Индия халҡтарының хеҙмәтен һәм тилмереүҙәрен күрҙе һәм көнсығышты тулы тәрәнлектә аңлай алыуын күрһәткән алты шиғырҙан һәм баллалаларҙан торған был цикл — шағирҙең көслө тауышы булып тора.

Лауреаттар-драматургтар араһында Борис Ромашов — совет драматургияһын башлап ебәреүселәрҙең береһе. Ромашовтың Малый театр тарафынан ҡуйылған «Бөйөк көс» тигән һуңғы пьесаһы бик көн үҙәгендәге әйбер. Ул беҙҙең ғилми интеллигенцияның тормошона арналған. Драматург беҙҙең ғалимдарҙе ҙур мөхәббәт менән күрһәтә, һәм, шул уҡ ваҡытта, Көнбайыш алдында баш әйеүселәрҙе тәрән нәфрәт менән фаш итә. Пьесаның тура һәм үткер, көн үҙәгендә булған ваҡиғаларына, аудиторияның нисек бик тиҙ һәм үткер яуап биргәнен күрергә һәм ишетергә кәрәк.

Эстон халыҡ яҙыусыһы Август Якобсон ҡайтанан премия менән билдәләнде. Күптән түгел беҙ уның «Цитаделдәге тормош» тигән пьесаһын уҡыныҡ, Мәскәү театрҙарында ҡараныҡ. Якобсон был пьеса артынан «Фронт линияһынан башҡа көрәш» тигән пьеса яҙҙы. был пьеса — тәрән әҙәби, едди, философик һуғарылған әҫәр.

Икенсе дәрәжәләге премияны драматургтар Николай Вирта һәм Анатолий Софронов алды. Романдары, пьесалары һәм Сталинград һуғышы тураһындағы сценарияһы буйынса беҙҙең уҡыусыларыбыҙға таныш булған Вирта һуғыштан һуңғы колхоз эштәре тураһында әйбәт пьеса тыуҙырҙы.

Драматург һәм шағир Анатолий Софронов «Бер ҡалала» тигән пьеса яҙҙы. Халыҡ менән бәйләнеште өҙгән ҡайһы бер типтарҙы нисек фаш иткәнен күрһәтте.

Әҙәби тәнҡит өлкәһендәге хеҙмәттәргә лә Сталин премиялары беренсе тапҡыр бирелде. Академик Б. Асафьевтең рус композиторы Глинка тураһындағы китабы беренсе дәрәжәләге премия менән билдәләнде. Икенсе дәрәжәләге премиялар менән профессор В. Мейлахтың «Ленин һәм XIX быуат аҙаҡтарында һәм XX быуат баштарында рус әҙәбиәте проблемалары», профессор М. Нечкинаның «Грибоедов һәм декабристәр» тигән китаптарына бирелделәр.

Тәнҡитселәр һәм әҙәбиәт белгестәре китаптарына өс премия биреләү — ул шатландырғыс факт.

* * *

Шул рәүешсә, лауреаттарҙың круғы киңәйҙе... Яҙыусылар, шағирҙәр, драматургтар һәм тәнҡитселәрҙең беренсе отряде партия Үҙәк Комитетенең ҡарарҙарына һәм саҡырыуына яуап итеп алға табан киң һәм ҡыйыу аҙым яһанылар. СССР-ҙың әҙәбиәте — тулыһынса хәрәкәттә, һөжүмдә. Яҙыусылар үҙҙәренең көстәрен халыҡҡа хеҙмәт итеүгә бирәләр. Әҙәбиәтселәргә бирелгән премиялар яҙыусыларҙың бөтәһенә лә — ҡарттарына һәм йәштәренә, ҡулына ҡәләм алырға теләүселәргә, был эштә үҙҙәрендә һәләтлек һиҙеүсе бөтә кешеләргә саҡырыу булыр: әҙәби хеҙмәткә ҡыйыурaҡ тотоноғоҙ! Беҙҙең тормошобоҙҙо көүҙәләндереү өсөн ҡыйыурaҡ керешегеҙ. Совет яҙыусыларының яңы әҫәрҙәре беҙҙең бөйөк халҡыбыҙҙың эшенә, коммунизм эшенә тағы ла ҙурыраҡ көс менән хеҙмәт итһендәр!

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Виктор Федорович Авдеев.

Мирзо Турсун-Заде.

Борис Сергеевич Ромашов.

Анатолий Владимирович Софронов.

Борис Соломонович Мейлах.

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Һүрәттә, юғарынан түбәнгә табан: Михаил Семенович Бубеннов, Петр Андреевич Павленко, Вера Федоровна Панова, Федор Иванович Панферов, Берды Мурадович Кербабаев, Валентин Иванович Костылев, Вера Казимировна Кетлинская.

Халыҡ-ара күҙәтеү

Совет-Финляндия договорына кул куйылғандан һуң

Финляндия хөкүмәт делегацияһы хөрмәтенә ойошторолған төшкө ашта иптәш И. В. Сталиндең телмәре һәм дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Мәскәүҙә кул куйылған Совет-Финляндия договорының тексы, Финляндияла булһын, шулай уҡ унан тыш та ҙур тәьҫир яһанылар. Иптәш Сталиндең телмәрендә һәм договорҙа Советтар Союзының Финляндияға булған мөнәсәбәтендә тыныслыҡты һәм иминлекте нығытыуға йүнәлтелгән тыныслыҡ политикаһының сталинсе принциптарын сыңғыл эш иткәнлеген фин халҡы тағы ла бер тапҡыр күрҙе.

Совет-Финляндия договорының ике тарафтың да тулыһынса тиң хоҡуҡлы булыуы тураһында, бәләкәй һәм ҙур милләттәрҙең бөтәһенең дә бер тиң булыуҙары, СССР һәм Финляндия халҡтары араһында үҙ-ара ышаныусанлыҡты булдырыу кәрәклеге тураһында иптәш Сталиндең күрһәтмәләре Финляндияла айырыуса ҙур тәьҫир яһанылар.

Финляндияның демократик газеталары һәм политик дейтеләре илдең килясәге өсөн һәм тыныслыҡ өсөн договорҙың әһәмиәтенә бик юғары баһа бирәләр. «Совет-Финляндия пакты, — тип яҙа «Вапаа сана» газетаһы, — Финляндия аша Советтар Союзына һөжүм итеү ҡурҡынысын булдырмау менән бергә, шул уҡ ваҡытта Финляндияның үҙе өсөн дә тыныслыҡты һәм бойондороҡһоҙлоҡто һаҡлауҙың иң яҡшы гарантияһы буласаҡ». «Сталиндең телмәре, — тип яҙа шул уҡ газета, — Финляндия менән Советтар Союзы араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтерергә иң мөһим момент булып ҡына ҡалмай, бәлки ғөмүмән Советтар Союзының тышҡы политикаһының принциптарын күрһәтеү булып та тора».

Финляндия сейме председателе Фагерхольм договорҙы «Финляндия һәм уның көнсығыштағы күршеһе араһындағы дуҫлыҡты нығытыуҙы көсәйтеүгә алып барыусы ҙур прогресс» — тип һанай. Договорға ҡарата булған фекерҙәрҙең күпселеге ошондай уҡ рухта яҙылған.

Совет-Финляндия договоры тағы ла бер йәһәттән әһәмиәтле булып тора. Билдәле булғанса, Американың һәм Англияның реакцион матбуғатында, Финляндияның үҙенең реакцион матбуғатында Советтар Союзы менән Финляндия араһында буласаҡ һөйләшеүҙәр тураһында яһалған төрлө белдереүҙәр айҡанлы «холлокка төшереү» ҡурҡынысы һәм башҡалар тураһында бик ҙур тауыш күтәрелгәйне. Юнайтед Пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһе Хайтауэр, Мәскәүҙәге һөйләшеүҙәр «Рәсәйҙең Финляндия өҫтөнән тулыһынса хакимлек итеүен урынлаштырыуға» килтерәсәк, тип раҫлағайны.

Беҙ ошо яла ағыу кампанияһы селләрәнә килде. В. М. Молотов договорға кул куйған ваҡытта һөйләгән телмәрендә, «Финляндия хөкүмәте тарафынан тапшырылған проект договорҙың нигеҙе итеп алынды», тип күрһәтте. Финляндия хөкүмәт делегацияһының члендәре лә ошо уҡ һүҙҙәрҙе айырыуса билдәләйҙәр. Был договорҙың Финляндия бойондороҡһоҙлоғон нығытҡанлығы һәм бәләкәй халҡтарҙың хоҡуҡтарын, интерестәрен хөрмәт итеү миҫалы булып торғанлығы бөтә донъяға күренде. Англияның реакцион газеталары һәм башҡа газеталар договор тураһында хәҙер бер һүҙ ҙә яҙмаҫҡа, йәки үҙҙәренең һүҙҙәренән кире ҡайтырға мәжбүр булдылар. «Финляндияның Советтар Союзы менән яңы договоры, — тип яҙа Англияның «Дейли экспресс» газетаһы,— уҫал уйлы күрәҙәселәрҙең бөтә алдан ҡысҡырыуҙарын кире ҡаға».

«Уҫал уйлы күрәҙәселәр» Совет-Финляндия договоры айҡанлы Советтар Союзына ҡаршы юнәлтелгән кампаниялары менән нәмәгә өлгәшергә тырыштылар һуң? тигән тәбиғи һорау килеп тыуа. Был кампанияның мәҡсәте: һөйләшеүҙәрҙе өҙөү, Финляндияны ғына түгел, бәлки Скандинавияның бөтә илдәрен — Норвегияны, Швецияны, Данияны, СССР-ға ҡаршы юнәлтеү һәм, шулай итеп, уларҙы Көнбайыш блоғы союзына инергә мәжбүр итеү ине.

Тыныслыҡ һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлек дошмандарының мәҡсәттәре ниндәй генә булмаһын, уларҙың үҙҙәренең ошо кампанияларында серьез уңышһыҙлыҡҡа осрауҙары шик ҡалдырмай. Тыныслыҡ һәм хеҙмәттәшлек итеү эше яңы еңеүгә өлгәште.

Румыния республикаһының яңы Конституцияһы

Румынияның Бөйөк милли собраниеһе халыҡ демократияһы фронты тарафынан эшләнгән Конституция проектын бер тауыштан ҡабул итте һәм республиканың яңы хөкүмәтен төҙөнө. Хөкүмәт составына бөтә демократик партияларҙың вәкилдәре инде.

28 мартта һайлауҙарҙың уңышлы тамамланыуы һәм Конституцияның ҡабул ителеүе — Румыния демократия көстәренең әле ҙур еңеүе һәм Румынияның яңы асыҡ күҙәлләнеүе булып тора. Яңы Конституция румын халҡының бөтә демократик ҡаҙаныштарын нығыта. Ул, республикала бөтә государство власе халыҡ ҡулында, тип белдерә. Конституцияның ҡабул ителеүе Бөйөк милли собраниеһе составы Конституцияның ошо статьяһына иллюстрация булып хеҙмәт итә ала. 1928 йылда Румыния парламентында 387 депутаттың 262-һе эре помещиктар һәм капиталистар, ә ҡалғандары вазирлар капиталистар ине. Румынияның реакцион парламентында бер генә эшсе лә, бер генә крәҫтиән дә булманы.

Хәҙер Бөйөк милли собрание составына 177 эшсе, 66 крәҫтиән, интеллигенция вәкилдәре, шул иҫәптән илдең 20 күренекле ғалиме һайланды. Конституция, халыҡ тарафынан дүрт йыл срокҡа һайлана торған урындағы советтарҙы төҙөү юлы менән, властең түбәнге органдарын демократиялаштырыуҙы күҙҙә тота.

Румынияла ниндәй енестән, диндән һәм милләттән булыуына ҡарамаҫтан бөтә граждандарҙың тигеҙ хоҡуҡлы булыуы тормошҡа ашырылды, һәм яңы демократик Конституцияла яҙылды. Халыҡҡа бөтә граждандыҡ азатлыҡтары тәьмин ителде. Уҙған режимдәр ваҡытында халыҡтың бындай ирклектәре булмаһы һәм булыуы ла мөмкин түгел ине.

Социаль экономик өлкәлә Румыния демократияһының уңыштары ҙур. Ер реформаһы үткәрелде, государство банкыһына национализация үткәрелде, государствоның промышленность управлениелары төҙелде, был капиталистарҙың эштәре өҫтөнән государство һәм эшселәр контроленә урынлаштырыу һәм уларҙың эксплоататорлыҡ тенденцияларын сикләү тигән һүҙ. Киләсәктә эшләп сығарыуҙың бөтә средстволары, тәбиғи байлыҡтар, тимер юлы һәм йылға транспорты, почта, телеграф, радио һәм башҡалар государство мөлкәтенә күсергә тейештәр.

Демократик власть йылдары эсендә Румыния халыҡ республикаһының тышҡы политик позициялары нығыны. Был Румынияның бөтә күршеләре менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре булдырыуҙа һәм СССР менән, шулай уҡ яңы демократия илдәре менән дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам тураһында договорҙар төҙөүҙә үҙенең кәүҙәләнешен тапты.

Парламент менән бергә бөтә халыҡ яңы Конституцияны хупланы. «Румынияның бөтә халҡы, — тип яҙа «Нациуна» газетаһы, — яңы кин перспективалар асыусы Конституцияны ҡотлай. Румыния халҡы үҙенең яңы Конституцияһы менән ғорурлана».

АҠШ-та һәм Англияла реакцион круттар Румынияла булған һайлауҙар һәм яңы Конституция ҡабул ителеүе айҡанлы яңы Румынияға һәм румын халҡына ҡаршы йүнәлтелгән яла яғыу кампанияһын кин йәйелдерҙеләр. Ләкин румын халҡы иленең яҙмышын үҙ ҡулында ныҡ тота. Румыния республикаһының яңы Конституцияһы, бер кемдең дә халыҡ ҡулынан власте тартып ала алмаясағын, бер кемдең дә румын халҡын демократик үҫеш юлынан ситкә тайпылдыра алмаясағын иҫбат итә.

Женевалағы конференцияһынан тышта

Матбуғат һәм информация ирклеге мәсьәләләре буйынса хәҙер Женевала бара торған халыҡ-ара конференцияла Америка делегацияһы комиссияларҙың берсеһендә үҙенең тәҡдимен индерҙе, бында ул ялған һәм боҙоп күрһәтелгән хәбәрҙәрҙе баҫып сығарыу өсөн уголовный яза биреүгә ҡаршы фекер белдерҙе.

Матбуғат ирклеге мәсьәләләре буйынса конференцияның эш барышында, ҡайһы бер газета монополияларының һәм улар артына йәшеренеп тороусы кешеләрҙең ялған информацияға ҡаршы көрәш өсөн ниндәй ҙә булһа саралар күреү менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмауҙарын күрһәтеүсе башҡа миҫалдар ҙа аҙ булманы.

Бизонияла «Протокол М» тигән исем аҫтында коммунистарға ҡаршы ялған документ баҫылып сығыу тарихе бөтә кешенең хәтерендә. Был ялған хәбәр, компартияның «Коминформ заданиеһе буйынса» Көнбайыш Германияның экономик тормошонда тәртипһеҙлек тыуҙыра һәм власте баҫып алырға әҙерләнә, тип «иҫбат» итер өсөн баҫып сығарылды. «Протокол М» тирәһендә күтәрелгән шау-шыу Көнбайыш Германияла аслыҡ һөҙөмтәһендә килеп тыуған тынысһыҙлыҡтарҙан һәм Англияның-Американың Германияны бүлгеләү политикаһынан бөтә донъя общественносенең фекерен ситкә йүнәлдереү өсөн кәрәк булды.

Англия парламентендәге официаль кеше, Англия хөкүмәте «Протокол М»дең ысын булыуында шик тотмай, тип белдерҙе. Немец газетаһы «Берлин ам миттаг» ошо көндәрҙә, «Протокол М» ысын материал түгел, ләкин кәрәк булды, тип яҙҙы.

Ике ай үтеп китте. Хәҙер Англия һәм Америка матбуғатында, Англия разведкаһы «Протокол М»дең ялған икәнлеген билдәләне һәм коммунизмға ҡаршы булған был ялғандың авторын ҡулға алды, тигән хәбәр баҫылып сыҡты. Англияның «Стар» газетаһы хәҙер, «Англияның ҡайһы бер дипломаттары һәм Англияның йәшерен хеҙмәт сотрудниктәре «Протокол М» менән булған хәл айҡанлы үҙҙәрен уңайһыҙ һиҙәләр», тип яҙа.

Шулай итеп, хәҙер инде бер кем дә «Протокол М»дең ялған икәнлегенә шик тотмай һәм бөтә был провокация емерелде. Ләкин провокаторҙар шуға ҡарамаҫтан һаман тыйылмайҙар әле.

Хәҙер Германияла «Коммунистарҙың саботаж планы» тураһында яңы ялған хәбәр баҫып сығарҙылар. «Дер Курир» газетаһында (Берлиндең Франция секторы) баҫып сығарылған ялған документтең йөкмәткеһенә ҡарап хөкөм иткәндә, быны яҙыусы авторҙарҙың үҙ фантазияһы етмәгән, һәм был ялған документ нигеҙҙә, насарлығы менән дан алған «Протокол М»дең ялғандарын ҡабатлай.

Американың Боготалағы (Колумбия) хәбәрселәренә бирелгән инструкциялар был йәһәттән бик характерлы булып торалар. Мәҫәлән, «Нью-Йорк таймс» газетаһының хәбәрсеһе, башта Боготала хәбәрселәргә сит илгә нәмә булһа ла хәбәр итеүҙе ғөмүмән тыйҙылар, тип белдерҙе. Бер ни тиклем һуңыраҡ АҠШ государство секретаренең Боготаға килгән ярҙамсыһы Армор, хәбәрселәрҙең государство департаменте матбуғат бүлеге бергәләп хәбәр биреүҙәрен рөхсәт итте.

11 апрелдә иртән, тип яҙа «Нью-Йорк таймс» газетаһы, хәбәрселәргә, «ваҡиғаларҙы унда коммунистар ҡатнашҡан итеп яҡтыртыу урынлы булып тора һәм был обстоятельствоны айырыуса билдәләүсе хәбәрҙәр сит илдәргә үткәреләсәктәр» тигән күрһәтмә бирелгән.

«Протокол М» исеме аҫтындағы ялған хәбәр нисек уңышһыҙлыҡҡа осраған булһа, Колумбиялағы «коммунистик заговор» тураһындағы ялған хәбәр ҙә шулай уҡ уңышһыҙлыҡҡа осраны.

Женева конференцияһында ин өсөн ҡайһы бер кешеләрҙең ялған хәбәрҙәр таратыусыларға яза биреүҙе булдырырға теләмәүҙәрен ошо фактылар тәжрибәһенән дә аңларға мөмкин. Шуға күрә ошо конференцияла матбуғаттың демократик ирклелеген ысынлап тәьмин итеү принциптарын яҡлаусы һәм матбуғатта ялған хәбәр яҙыуҙы һәм һуғыш пропагандалауҙы тамырынан юҡ итеү өсөн көрәшеүсе СССР-ҙың һәм ҡайһы бер башҡа илдәр делегацияларының дөрөҫ һәм тәҙел информация өсөн көрәштә ғәҙәттән тыш серьез ҡаршылыҡтарға осрағанлыҡтары ғәжәп түгел.

А. Шатилов.

Хеҙмәткә өйрәнеп, үҫәләр



Ҡарап торһаң, бәйләм энәһе тотҡан кул бармаҡтарының хәрәкәттәренә күҙ ҙә эйәрерлек түгел. Ә Раиса үҙе, шундай етеҙлеккә бер күнегеп алғас, артыҡ ҡабаланмай ҙа һәм әлбиттә, «күҙ» иҫәбен дә яңылыштырмай. Бөтә иғтибарын биреп, бәләкәй шарфын тиҙерәк бәйләп бөтөрөргә тырышып эшләй.

Балаларҙың тырышлығына ҡыуанып, уларҙың эштәрен ҡарап йөрөүсе апаһын — пионер вожатый Нажиә Хәйруллинаны ла үҙ тураһына килеп еткәс кенә күреп ала ул һәм, бер генә минутҡа туҡталып, бик етди төҫ менән бәйләмен күрһәтә.

— Бәйләп бөтөрөп киләм инде. Нисек.., Әйбәт булырмы?—ти. Унан һуң, бик кәрәкле нәмәһен хәтерләгән һымаҡ, күҙҙәрен сылт-сылт йомоп ала ла, үҙенең дуҫын маҡтап ҡуя.—Ә Зоя бейәләйҙе минекенән дә матур итеп бәйләй!

Вожатый тәүҙә уның сом ҡара күҙҙәренә ҡарап тора. Унан һуң бәйләмде ҡулына ала ла, пионерка Раиса Тарасоваға рәхмәт белдереп, уның хәтерен ҡалдырмаҫлыҡ итеп, иркәләп кенә әйтә:

— Икегеҙ ҙә матур бәйләйһегеҙ, аҡыллым. Тик ул тиклем ашығырға ғына ярамай...

Ни өсөн ашығырға ярамағанлығы тураһындағы һүҙҙе тыңлау өсөн башҡа ҡыҙҙар ҙа урындарынан тороп, бәйләмдәрен ҡулдарына тотҡан килеш, Раиса һәм вожатый эргәһенә йыйылалар. Бик бәләкәйҙәр ҙә түгел инде улар. Раиса менән Зоя быйыл яҙ ун икенсе йәшкә сығалар, башҡаларының ҡайныһына туғыҙ, ҡайныһына ун йәш тулып килә. Уҙған көҙҙә Раиса, кемдән күрмәкселәр инде, ял ваҡытында ябай тимер сыбыҡтан бәйләм энәләре яһатып, ойоҡбаш бәйләргә тотонғайны. Балаларҙы Раисаның бәйләме бик ҡыҙыҡһындырҙы. Улар үҙҙәре лә эшкә өйрәнмәксе булдылар. Пионер вожатый Нажиә Хәйруллина ҡыҙҙарҙың тырышлығын күреп бик шатланды һәм шул аҙнала уҡ улар өсөн ҡул эштәре түңәрәге ойоштороп ебәрҙе.

Бәйләм бәйләргә өйрәнеп китеү еңел генә булманы. Өйрәтеп, күрһәтеп торорға әсәйҙәре юҡ ине бит уларҙың. Ошонда — балалар йортонда 5—6 йәштән бирле тәрбиәләнеп үҫкән ҡыҙҙарҙы пионер вожатыйы һәм тәрбиәселәр бәйләм энәһе тоторға, үҙ әсәйҙәре кеүек итеп, өйрәттеләр. Бына хәҙер ҡарағыҙ инде тырыш ҡыҙҙарҙың эштәренә: ап-аҡ йөндән бәйләнгән суҡлы шарф Раиса Тарасованыҡы, бейәләй, ойоҡбаш һәм беретка Зоя Дергунова эше, ә күлдәктәрҙе Люба Бивзюкова теккән.

Түңәрәктә хәҙер 22 бала ҡатнаша. Улар март айында ғына үҙҙәре һәм үҙҙәренең иптәштәре — тәрбиәләнеүсе балалар өсөн 45 пар йөн ойоҡбаш һәм 15 шарф һәм бейәләй бәйләнеләр. Түңәрәктең иң тырыш члене Раиса Тарасова һәр аҙна һайын 4-әр пар ойоҡбаш бәйләп, бөтә иптәштәренән дә уҙҙыра.

Миәкә районының Ҡыңғыр Мәнәүез балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр бына ошолай ҡул эштәренә өйрәнеп, сыныҡып үҫәләр.

Һүрәттә: (һулда) Балалар йортондағы пионер ойошмаһының вожатыйы — ҡул эштәре түңәрәген ойоштороусы Нажиә Хәйруллина, (унда) балаларҙың үҙ ҡулдары менән бәйләгән бәйләмдәре һәм теккән күлдәктәре.

Ғ. Әхмәти тексы.
В. Жданов фотоһы.

Отошло вкладтар

Государстволың доходтарында социалистик промышленноста, транспортта, сауҙа һәм ауыл хужалығында яһалған накоплениелар менән бер рәттән, халыҡтан ирекле рәүештә, бигерәк тә государство заемдары аша алынған аҡсалар һәм һаҡлыҡ кассаларына һалынған вкладтар ҙур урын тота.

Хеҙмәтсәндәрҙең һаҡлыҡ кассаларында йылдан-йылға арта барған вкладтары һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планда ҡаралған СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү сараларын финансировать итеүҙә мөһим өҫтәмә сығанаҡ булып тора.

Һаҡлыҡ кассаларына һалынған вкладтарҙың бер төрө булып отошло вкладтар иҫәпләнә. Был башҡа вкладтарҙан шуның менән айырыла: ул вкладтарға доходтар отош формаһында түләнә.

Отошло вкладтар буйынса отош тираждары йылына ике тапҡыр — апрель һәм октябрь айҙарында үткәрелә.

Һәр тиражда бер мең лицевой счетҡа 25 отош уйнала. Шуларҙан бер отош ярты йыл буйына һаҡлыҡ кассаһының счетында һаҡланған һәм отош сыҡҡан вкладтың 200 процент күләмендә, ике отош 100 процент күләмендә, 22 отош 50 процент күләмендә.

Отоштоң күләме вкладтың күләменә һәм оҙаҡ һаҡланыуына ҡарап арта. Отошло вкладтар ССР Союзының бөтә һаҡлыҡ кассалары тарафынан да ҡабул ителәләр. Һәр бер гражданинға отошло вкладтар буйынса 10 мең һумға тиклем суммала булған вклад менән бер йәки бер нисә кассала сикләнмәгән һанда счет асырға хоҡуҡ бирелә. Шулай уҡ вкладчикҡа теләгән ваҡытта отошло вкладты тулыландырырға йәки уны ваҡлап йәки тотошо менән һаҡлыҡ кассаһынан алыу хоҡуҡы ла бирелә. Отошло вкладты теләгән бер һаҡлыҡ кассаһына күсерергә мөмкин. Уның менән вкладты һаҡлау срогы туҡтатылмай.

Һаҡлыҡ кассалары вкладчиктарына «ССР Союзы государство хеҙмәт һаҡлыҡ кассалары тураһындағы положение» менән бирелгән бөтә хоҡуҡтар һаҡлыҡ кассаларында отошло вкладтар һаҡлай торған бөтә вкладчиктарға ла тарала.

Үҙеңдең һаҡлыҡ аҡсаңды отошло вкладта һаҡлау уңайлы, ышаныслы һәм файҙалы.

Граждандар! Үҙегеҙҙең аҡсаларығыҙҙы һаҡлыҡ кассаларында һаҡлауығыҙ менән сталинсе дүртенсе биш йыллыҡты үтәүҙә һеҙ актив ҡатнашасаҡһығыҙ.

Һаҡлыҡ кассаларында вкладчиктар булығыҙ, аҡсағыҙҙы отошло вкладтарҙа һаҡлағыҙ. Отошло вкладтар буйынса үткәрелгән отош тираждарында ҡатнашығыҙ.

Я. Бәдретдинов.

Ауыл хужалығы брошюралары

Башҡортостан государство издательствоһы популяр ауыл хужалығы брошюраларын массовый тиражда сығара башланы. «Башҡортостанда урындағы ашламалар һәм уларҙы файҙаланыу», «Көҙгә арыш сәсеүлеген нисек тәрбиәләргә», «Бойҙай һәм тары агротехникаһы» тураһындағы брошюралар баҫылып сыҡтылар ҙа инде.

«Арыштан һәм бойҙайҙан юғары урожай алыуҙа Башҡортостан Социалистик Хеҙмәт Геройҙары» тигән йыйынтыҡ әҙерләнә. Шулай уҡ «Башҡортостанда шәкәр сөгәлдерен үҫтереүҙә Социалистик Хеҙмәт Геройы Бәнат Батырованың эш тәжрибәһе», Башҡортостанда күк һағыҙ агротехникаһы», «Баҡалы районы «Красный пахарь» колхозындағы бер звеноның эш тәжрибәһе» тигән брошюралар баҫылып сығасаҡтар.

Быйыл госиздат ауыл хужалығы темаларында бөтәһе 65 брошюра сығарасаҡ.

Композиторҙар съезы

Ошо йылдың 19 апрелендә Мәскәүҙә совет композиторҙарының беренсе Бөтә Союз съезы асыла. Съезд, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең В. Мурадели операһы тураһында ҡарары нигеҙендә, музыкаль культураны күтәреү бурыстары тураһында композитор Б. Асафьев, Т. Хренников иптәштәрҙең докладтарын тыңлаясаҡ. Шулай уҡ көн тәртибендә композиторҙар Союзының ойоштороу комитетен — союзға әйләндереп, правление һәм президиум етәкселеген һайлау мәсьәләһе тора.

Бөтә Союз съезында Башҡортостан композиторҙарынан Х. Әхмәтов, Х. Заимов, Р. Мортазин иптәштәр ҡатнашасаҡтар.

„Октябрь" журналының өсөнсө номере сыҡты

«Октябрь» журналының 3-сө номере баҫылып сыҡты һәм подписчиктарға таратыу өсөн «Союзпечатҡа» тапшырылды.

Журналдың был номерендә Сергей Наровчатовтың «Коммунистар партияһының манифесе» тигән шиғыры, белорус шағирҙәре Петрусь Бровканың «Икмәк» тигән поэмаһы һәм Янко Купала, Якуб Колас, Пимен Панченко иптәштәрҙең әйбәт шиғырҙары урынлаштырылған. В. Панованың «Юлдаштар» тигән повесенең аҙағы бирелгән.

Оригиналь әҫәрҙәрҙән: Ҡадир Даян, Тимер Арслан шиғырҙары, Әнүәр Бикчәнтәй, Шәриф Бикҡол очерктары урынлаштырылған.

Әҙәби тәнҡит бүлегендә Жәләл Лоҡман иптәштең «Сәйфи Ҡудаштың Октябрь революцияһына тиклемге әҫәрҙәре» тигән мәҡәләһе баҫылған.

Донъя шахмат чемпионаты

Донъя беренселегенә матч-турнирҙың 13-сө турында, 15 апрелдә, Смыслов менән Ботвинник бейә осрашты. Решевский ауырыу булыу сәбәпле, Керес менән уйнаманы. Смыслов — Ботвинник партияһы, Смыслов өсөн аҡсар хәлдә кисектерелде.

14-сө тур 18 апрелдә була.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт государство академия театрында — көндөҙ «ДЕВОН», кис «БАЛКАНДА».

Рус драма театрында — көндөҙ һәм кис «ТАЛАНТТАР ҺӘМ БАҪЫМ ЭЙЕУСЕЛӘР», башлана көндөҙ 1 сәғәттә, кис 8 сәғәт 30 минутта.

Башгосфилармонияла — халыҡ театры артистәре ҡатнашлығы менән эстрада концерте. Киске 8 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».
«Салауатта» — «ЧАПАЕВ».
Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».

«Промкооччас» артеле түбәндәгеләрҙе белдерә: 1947 йылдың октябренә тиклем ремонтҡа тапшырылған сәғәттәр 1948 йылдың 1 майына тиклем алынырға тейештәр.

Алынмаҫы йылдың 1 майынан һуң был сәғәттәр һатылалар һәм бер ниндәй ҙә дәғүәләр ҡабул ителмәйәсәк.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П00126 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 79
20 апрель шишәмбе
Хаҡы 20 тин

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

1948 йылдың беренсе кварталында БАССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство планын үтәү йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының Башҡорт АССР-ы буйынса уполномоченныйының белдереүе. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Г. Вахитов.—Эшкыуарлы йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшенә иғтибар бирмәйҙәр. Х. Мусин. — Колхозды нығытыу өсөн көрәш. (2-се бит).
И. Абдуллин. — Агитаторҙар звеноларҙа булмайҙар. (2-се бит).
Эске мөмкинлектәрҙе, коллективтарҙың һәләтлеген биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүгә туплағыҙ.
А. Ракитин. — Тағы ла күберәк накоплениеләр бирәйек. Х. Сиразетдинов. — Яңы техника һәм нефтсе кадрҙар. (2-се бит).
МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. Газета һәм алдынғылар эш тәжрибәләре. (3-сө бит).
Баҫыу эштәрен һәр бер колхозда ойошҡан рәүештә башларға! (3-сө бит).
С. Демидов. — Социалистик ауыл хужалығында иң уңыштар. (3-сө бит).
А. Первозванский. — Күп йыллыҡ үләндәр сәсеүҙе яңы үткәрергә. (4-се бит).
Рахман Кәли.—Матур уҡыштар. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Урындағы матбуғаттың иң мөһим бурыстары

Бөйөк Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә совет халҡы халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең биш йыллыҡ планын уңышлы рәүештә тормошҡа ашыра. Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярыш бөтә илдә киң рәүештә йәйелдерелде. Ағымдағы йылдың беренсе квартал йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының ошо көндәрҙә иғлан ителгән белдереүе беҙҙең уңыштарыбыҙҙы бик асыҡ дөрөҫләй.

Илебеҙҙең артабан сәскә атыуы һәм уның ҡеүәтен тағы ла нығытыу өсөн барған был бөтә халыҡ көрәшендә партия ойошмалары массаға политик етәкселектә бөтә средстволарҙы һәм беренсе нәүбәттә газетаны ни тиклем яҡшы файҙаланһалар, үҙҙәренең етәкселек ролдәрен шул тиклем уңышлы үтәйәсәктәр. Матбуғат беҙҙең партиябыҙҙың иң үткер һәм иң көслө ҡоралы, — тип өйрәтә иптәш Сталин.

Өлкә һәм край газеталары редакторҙарының күптән түгел булып үткән кәңәшмәһендә большевистик матбуғаттың тәрбиә һәм ойоштороу яғынан бик ҙур роль уйнауы тураһында күп кенә миҫалдар килтерелде. Бына, мәҫәлән, «Ленинградская правда» «Уральский рабочий», «Курская Правда», «Волжская коммуна» (Куйбышев ҡалаһы) газеталары һәм башҡа бик күп газеталар хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө мәсьәләләрен киң рәүештә, бөтә яҡлап яҡтырталар, социалистик ярыштың пропагандистәре һәм ойоштороусылары булып сығыш яһайҙар.

Ләкин урындағы газеталарҙың байтағы үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы үтәп еткермәйҙәр әле. Партияның күп кенә өлкә комитеттәре үҙ газеталарының йөкмәткеһен тамырынан уҡ яҡшыртыуға, уларҙың идея-политик кимәлләрен күтәреүгә өлгәшеп еткәндәре юҡ әле.

Бына Кемерово өлкәһенең «Кузбасс» газетаһы. Ул илебеҙҙең иң күп күмер биреүсе районларының береһендә сығарыла. Был — газетаның бөтә эшмәкәрлеген, уның йөҙөн билдәләргә тейеш ине. Шуға ҡарамаҫтан, күмер промышленноҫының эше «Кузбасс» газетаһы биттәрендә системаһыҙ, һай ғына, эште белмәйенсә яҡтыртыла. Газета шахталарҙың эшендәге төп, хәл иткес мәсьәләләрҙе һайлап ала белмәй, күмер сығарыуҙы күтәреү өсөн ныҡлап көрәшмәй. ВКП(б) Үҙәк Комитеты Кузнецк бассейнының ҡайһы бер шахталарында социалистик ярыш принциптәре тупаҫ рәүештә боҙолғанлығын, ярышта һәр кемдең үҙ теләге менән ҡатнашыуы урынына мәжбүр итеү юлы ҡулланылғанлығын, ә өлкә газетаһының был боҙоуҙарҙы ситләп үткәнлеген билдәләне.

Рязань өлкә газетаһы тарафынан сирьёз хаталар ебәрелгән. Редакция өлкәнең райондарында колхоз төҙөлөшөндә булған тупаҫ боҙоуҙарҙы күрмәгән. Газета колхоздарға ваҡ буржуаз, хосуси милекселек тенденцияларының үтеп инеүенә ҡаршы көрәш алып бармаған, ялҡауҙарға һәм әрәм тамаҡтарға, колхоз дисциплинаһын тарҡатыусыларға ҡаршы көрәшмәгән, үҙенең биттәрендә өлкәлә ауыл хужалығын үҫтереүҙең төп һәм нигеҙ мәсьәләләрен күтәреп сыҡмаған.

Кемерово һәм Рязань газеталарының хаталары был газеталарҙың тормоштан, массаларҙан, партия ойошмаларынан айырылғанлыҡтарының туранан-тура һөҙөмтәһе булып тора. Партияның Кемерово һәм Рязань өлкә комитеттәре үҙҙәренең матбуғат органдарының эшмәкәрлегенә йүнәлеш биреүҙән туҡтағандар, газеталарҙы политик, хужалыҡ һәм культура эштәренә партия етәкселеген көсәйтеү өсөн файҙалана алмағандар. Был — партияның башҡа ҡайһы бер өлкә комитеттәре өсөн дә һабаҡ булып тора. Партия комитеттәренең үҙ газеталарының артта ҡалыуы менән, идея-политик яҡтан түбән кимәлдә булыуҙары менән килешеп ҡарау фактыларын, уларҙың ролдәрен баһалап еткермәүҙәрен йыш ҡына осратырға тура килә.

Ундай хәлдәрҙе ҡырҡа бөтөрөргә кәрәк. Партия ойошмаларының етәкселәре газеталарҙан, матбуғаттан башҡа етәкселек итеүҙең мөмкин түгел икәнлеген хәтерҙәрендә тоторға бурыслылар. Яҡшы ойошторолған газета партия комитетенә идеологик эшкә, хужалыҡҡа яҡшыраҡ етәкселек итеүгә, етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләүҙе көсәйтергә һәм ул етешһеҙлектәрҙе йыллам бөтөрөүгә өлгәшергә мөмкинлек бирә.

Хәҙерге осорҙа совет матбуғатының бурыстары бик ҙур һәм күп төрлө. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәш һәм хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү, был бурыстарҙың иң мөһиме булып тора.

Матбуғаттың большевистик һүҙенең бөтә ҡеүәтен, үҙҙәренең бөтә ойоштороусанлыҡ көстәрен газеталар биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәүгә йүнәлдерергә тейештәр. Үҙҙәренең ойоштороусы, йүнәлеш биреүсе ролдәрен күтәреү өсөн газеталар ағымдағы хужалыҡ кампанияларын яҡтыртыу менән генә сикләнә алмайҙар. Улар өлкә, крайҙың экономикаһындағы төп һәм хәл иткес мәсьәләләрен таба белергә һәм тәрән рәүештә яҡтырта белергә тейештәр. Хужалыҡты үҫтереү темпын тиҙләтеү өсөн, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында эске резервтарҙы мобилизовать итеү өсөн, ныҡлы экономия режимы өсөн, техник прогресс өсөн көрәш һәр бер газета редакцияһының эшендә төп урынды алырға тейеш.

Яҙғы сәсеү башланды. Хәҙер был биш йыллыҡты срогынан алда үтәү өсөн көрәштең иң мөһим участкаһы булып тора һәм беҙҙең матбуғаттың бөтә иғтибары шуға туплаған булырға тейешле. Яҙғы сәсеүҙә колхоздарҙың, совхоз һәм МТС-тарҙың эшен оператив һәм боевой рәүештә яҡтыртыу, баҫыу эштәренең юғары темпта һәм иң яҡшы сифатта үтәлеүе өсөн тырышыу, алдынғыларҙың тәжрибәләрен таратыу, ярышты үҫтереү, артта ҡалыусыларҙы тәнҡитләү һәм алға сығарыу — газеталарҙың иң беренсе бурысы бына шул.

Газета — политик орган. Хужалыҡ пландарын уңышлы үтәү өсөн көрәштә, партия, совет, хужалыҡ ойошмаларының эштәрен яҡтыртыуҙа ул юғары большевистик идеялылыҡ, принципиаллек һәм үткерлек күрһәтергә тейеш. Бөтә өлкә һәм край газеталарында партия тормошо бүлектәрен байтаҡ яҡшыртырға, партия работниктарын матбуғатта ҡатнашыу өсөн йәлеп итергә кәрәк. Идеологик эш мәсьәләләрен яҡтыртыу, партия пропагандаһында алдағы бурыстар тора. Хәҙер партия ойошмаларының пропаганда эшмәкәрлегенә, урындағы издательстволарҙың, театрҙарҙың, радио тапшырыуҙарының, культура-ағартыу учреждениеларының эшенә айырым иғтибар менән тәрән рәүештә иңеү талап ителә.

Киң ҡулғазарҙы булыу, урындағы тормошто бөтә яҡлап яҡтыртыу большевистик газеталарҙың айырылғыһыҙ сифаты булып тора. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең һәр бер республикаһы, һәр бер өлкәһе, һәр бер ҡалаһы һәм районы тулы ҡанлы тормош менән йәшәй. [illegible]

[illegible]

5 май — большевистик матбуғат көнө яҡынлаша. [illegible]

(«Правда» газетаһының 18 апрелендәге башмәҡәләһенән).

1948 йылдың беренсе кварталында БАССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство планын үтәү йомғаҡтары тураһында

СССР ГОСПЛАНЫНЫҢ БАШҠОРТ АССР-ы БУЙЫНСА УПОЛНОМОЧЕННЫЙЫНЫҢ БЕЛДЕРЕҮЕ

I.

1948 йылдың беренсе кварталында производство планы валовой продукция буйынса Министерстволарҙың айырым предприятиеләре тарафынан түбәндәгесә үтәлделәр:

	1948 йылдың I кварталында квартал планының үтәлеше процентарҙа
Ҡара металлургия Министерствоһы предприятиеләре	90
Төҫлө металлургия Министерствоһы предприятиеләре	57
Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	103
Электр станциялары Министерствоһы предприятиеләре	103
Химия промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	111
Резина промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	112
Электр промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	115
Связь средстволары промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	95
Станоктар төҙөлөшө Министерствоһы предприятиеләре	93
Промышленность төҙөлөшө материалдары Министерствоһы предприятиеләре	112
шул иҫәптә Башҡорт АССР-ы төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһе	142
Урман промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	105
шул иҫәптә Башҡорт АССР-ы урман промышленносе Министерствоһы	80
Ҡағыҙ промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	116
Текстиль промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	106
Еңел промышленность Министерствоһы предприятиеләре	92
шул иҫәптә Башҡорт АССР-ы Еңел промышленносе Министерствоһы	91
Ит-һөт промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	98
Аҙыҡ промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	95
шул иҫәптә Башҡорт АССР-ы аҙыҡ промышленносе Министерствоһы	121
Тәмле аҙыҡ промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	110
Балыҡ промышленносе Министерствоһы предприятиеләре	115
шул иҫәптә өлкә буйһоноуында булған предприятиеләр	91
Башҡорт АССР-ының урындағы промышленность Министерствоһы	94
Башҡорт АССР-ының урындағы ағыулыҡ промышленносе управлениеһе	101

1948 йылдың I кварталында Башҡорт АССР-ының бөтә промышленносендә валовой продукция эшләп сығарыу планы 94,2 процентҡа үтәлде.

Башҡорт АССР-ының бөтә промышленносендә 1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 14,3 процентҡа артты.

Промысловой кооперация һәм инвалидтар кооперацияһы буйынса 1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу планы 92,7 процентҡа үтәлде һәм промысловой кооперациялар системаһы буйынса үтәлеш түбәндәгесә (үтәлеш процентарҙа):

Промкооперациялар управлениеһе	95,4
Башлеспромсоюз	91,2
Башлесхимсоюз	105,3
Башкоопинсоюз	75,7

1948 йылдың I кварталында валовой продукция эшләп сығарыу планын 300 самаһы предприятие үтәне һәм арттырып үтәне.

Шул иҫәптә:

	(үтәлеш процентарҙа)
Черниковск фанера комбинаты	175
Өфө фанера заводы	165
Цемент-силикат комбинаты	148
Белорет «Автотрактородеталь» заводы	144
Бәләбәй машиналар төҙөү заводы	143
Башмельтрест	143
«1 Май» шырпы фабрикаһы	142
2-се күн заводы	142
1-се номерлы ҡыҙыл кирбес заводы	135
Тау оборудованиеләре заводы	129
Өфөнөң 2-се номерлы ағас заводы	121
Суднолар ремонтлау заводы	117
Ҡамыт-ыңғырсаҡ фабрикаһы	117
«Дубитель» заводы	113
Яҙыу машиналары заводы	113
Красноусол быяла заводы	113
Ишембай нефть эшкәртеү заводы	112
Стәрлетамаҡ туп тегеү фабрикаһы	112
Өфө синтетик заводы	112
Благовещен машиналар төҙөү заводы	110
Главмясо тресы	110
Өфө механика заводы	109
Киҙе-мамыҡ комбинаты	106
Макарон фабрикаһы	106
Техжирпром	103
Радиомеханика заводы	103
1-се номерлы ТЭЦ	103
Өфө нефть эшкәртеү заводы	102
«Ишембай нефть» тресы	101

II.

Башҡорт АССР-ының Министрҙар Советы ведомствоһындағы Министерстволарҙың предприятиеләре валовой продукция эшләп сығарыуҙың квартал планын 94 процентҡа үтәнеләр.

1948 йылдың I кварталында урындағы промышленностең валовой продукция эшләп сығарыуы 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 19 процентҡа артты.

III.

1948 йылдың I кварталында промышленность продукцияһының мөһим төрҙәрен эшләп сығарыу 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда түбәндәгесә үҫтерҙе:

	1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда 1948 йылдың I кварталында процентарҙа
Прокат	135
Ҡорос	133
Суйын	173
Нефть	143
Күмер	139
Металл ҡырҡыу станоктары	106
Электр лампылары	128
Каустик сода	302
Тәҙрә быяласы	182
Бысылған ағас материалдары	169
Киҙе-мамыҡ туҡымалар	213
Йөн туҡымалар	109
Күн аяҡ кейеме	110
Комбайн моторҙары	140
Кирбес	220
Эзбиә	148
Алебастр	395
Ҡағыҙ	259
Электр энергияһы	101
Яҙыу машиналары	136

IV.

Үҙәкләштерелмәгән әҙәниеләр буйынса беренсе кварталда тракторҙарға запас частәр етештереү планы 102 процентҡа үтәлде.

Ауыл хужалығы машиналарына запас частәр етештереү планы 65 процентҡа үтәлде.

Тракторҙарға һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр етештереү планын күпселек предприятиеләр үтәнеләр һәм арттырып үтәнеләр.

Айырым предприятиеләр—Стәрлетамаҡ станоктар төҙөү заводы, Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы, «Автотрактородеталь» заводы, хеҙмәт резервтары Управлениеһе, Ремтехбаза, Металлопромсоюз, Иглиндәге «Металлист» артеле тракторҙарға һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр етештереүҙең квартал планын үтәмәнеләр.

V.

1948 йылдың I кварталында капиталь эштәр күләме 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда 117 процент тәшкил итте, шул иҫәптә капиталь эштәр күләме нефть промышленносе буйынса—135 процент, урман промышленносе—122 процент, төҙөлөш материалдары промышленносе — 111 процент, электротехник промышленность — 124 процент, еңел һәм текстиль промышленносе буйынса 107 процент тәшкил итә.

1948 йылдың I кварталында торлаҡ төҙөлөшө буйынса капиталь эштәр күләме 1947 йылдың I кварталындағы торлаҡ төҙөлөшө капиталь эштәр күләменән дүрт тапҡыр күберәк булды.

VI.

1948 йылдың I квартал дауамында ваклап һатыу тауар әйләнеше айҙан-айға арта барҙы. 1948 йылдың март айында ваклап һатыу тауар әйләнеше 1948 йылдың ғинуар айына сағыштырғанда 39 процентҡа артты.

Айырым сауҙа ойошмалары тауар әйләнеше буйынса государство пландарын үтәмәнеләр. Тауар әйләнешенең квартал планы Башсоюз тарафынан 87,3, Өфөнөң икенсе торгы тарафынан 96,3, промкооперация тарафынан 77, ҡара металлургия ОРС-тары тарафынан 89 процентҡа үтәлде.

СССР Госпланы уполномоченныйы.

Нефть промыселдаре өсөн пар установкалары

БЛАГОВЕЩЕН. Оҙон цехтың майҙанында тимер юл вагонына оҡшаған бер вагон тора. Ләкин был ябай вагон түгел, уның тәгәрмәстәре юҡ, эсендә ятыр өсөн урындар ҙа яһалмаған. Ҙур сандарға ултыртып эшләнгән был вагон—ҙур аппараттар менән йыһазландырылған пар установкаһы. Нефтселәр уның менән ҡайнар пар ебәреп скважиналарҙы төрлө тау тоҡомдарынан таҙарталар. Был установканың насосы 75 атмосферлы ҡыҫымда 230 градус эҫелектә пар бирә ала. Установканың үҙенә һыу алыу өсөн насосы, динамо машинаһы бар. Уны бер кеше хеҙмәтләндерә.

Благовещен нефть машиналары төҙөү заводы бындай пар установкаларын эшләп сығарыуҙы бынан 3 йыл элек үҙләштергәйне. Хәҙер завод уларҙы күпләп эшләп сығара башланы. Нефтселәр өсөн ҡиммәтле булған был установкалар Баку, Алыҫ Көнсығыш, Урта Азия һәм илебеҙҙең башҡа промыселдарына ебәреләләр.

МТС сәсеүгә әҙер

КУШНАРЕНКО. Иҫке Туҡмаҡлы МТС-ы яҙғы сәсеүгә тулыһынса әҙер. Машиналарға ремонт күптән тамамланған, етерлек күләмдә яғыулыҡ һәм майлау материалдары ташылған.

Машина-трактор станцияһының коллективы хәҙер тракторҙарҙы тейндә эшләргә ҡулайлаштырыу сараларын күрә.

Трактор бригадаларын хеҙмәтләндереү өсөн МТС автомашинаға урынлаштырылған мастерской әҙерләне. Был мастерскойҙа бөтә төр инструменттар һәм запас частәр бар.

ХЕҘМӘТ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ ОРДЕНДӘРЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ

И. Н. Уелданов — Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 1947 йылда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер бойҙай урожайы алды.

С. А. Мырҙабулатов—Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың члены. Ул эшләгән звено 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алды.

Р. Т. Садикова —Туймазы районы «Булаҡ тау» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,97-шәр центнер арыш урожайы алды.

Ә. Ф. Әхмәтова—Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың члены. Ул эшләгән звено 9 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,1-әр центнер арыш урожайы алды.

Х. Х. Әхмәтов—Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры. Уның бригадаһы 18 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алды.

Партия тормошо

Зиянчурала йәш коммунистәрҙе тәрбиәләү эшенә иғтибар бирмәйҙәр

Партияның өлкә конференцияһы ВКП(б) райкомдарының тәүге партия ойошмаларына етәкселектә көсәйтеүҙе, уларҙы ойоштороу яғынан нығытыуҙы, партия йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәреүҙе һәм уларҙың тәрбиәүи ролен күтәреүҙе, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитте киң йәйелдереүҙе талап итте. Конференция партия-политик эшкә һәм производство тормошона актив йәлеп итеү юлы менән йәш коммунистарҙы, бигерәк тә кандидаттарҙы тәрбиәләү кәрәклеген айырыуса нык билдәләп үтте.

ВКП(б)-ның Зиянчура райкомы үҙенең эшен конференцияның ошо күрһәтмәләре нигеҙендә ҡорорға тейеш ине. Бында партия ойошмалары составының 82,5 процентын һуғыш йылдарында һәм унан һуңғы йылдарҙа ҡабул ителгән йәш коммунистар тәшкил итәләр. Ләкин партия райкомы (секретаре иптәш Рафиков) үҙенең эшендә коммунистар составындағы был үҙгәрешкә иҫәпкә алмай. ВКП(б) члендәрен һәм кандидаттарҙы политик яҡтан тәрбиәләүгә тейешле иғтибар бирмәй.

Шуның арҡаһында, тәүге партия ойошмалары ла коммунистарҙы тәрбиәләү, уларҙың производствола авангардлыҡ ролдәрен күтәреү менән шөғөлләнмәйҙәр. Коммунистарҙың масса араһында ойоштороусылыҡ һәләтлектәре түбән. «Красный партизан» колхозы партия ойошмаһында (секретаре иптәш Пряшников) 6 коммунист бар. Ләкин уларҙың артель эшенә йоғонтолары бик йомшаҡ. Коммунистар производствоның хәл иткес тармаҡтарына урынлаштырылмағандар, улар яҙғы сәсеүгә әҙерлек эште марҡышлау өсөн барған социалистик ярыш менән етәкселек итмәйҙәр. Колхоз сәсеүгә әҙер түгел. Сәсеү майҙанының 75 проценте генә ҡаплаулы орлоҡ тупланған. Ул таҙартылмаған һәм тейешле кондицияға еткерелмәгән. Ләкин партия ойошмаһы был хәлгә бер ҙә борсолмай.

Тәүге ойошмаларҙа партияның эске эштәре түбән кимәлдә тора. Партия йыйылыштары коммунистарҙы большевистик тәрбиәләү мәктәбе итеп әйләндерелмәгәндәр. Улар осраҡлы үткәрелә һәм түбән идея-политик кимәлдә үткәреләләр. «Большевик» колхозының партия ойошмаһы йылдан артыҡ вакыт эсендә ни бары 2 йыйылыш ҡына үткәргән. «Новый путь» колхозы партия ойошмаһының йыйылыштарында коммунистар бик пассив ҡатнашалар, ҡағиҙә рәүешендә, колхоз председателе, йәки партия ойошмаһы секретаре генә сығыш яһай. Һүрән МТС-ы партия ойошмаһының йыйылыштарында 21 коммунистан 10—11-е генә ҡатнаша. Коммунистарҙы эштең яуаплы тармаҡтарына урынлаштырыу, уларҙың авангардлыҡ ролдәрен күтәреү, коммунистарҙы тәрбиәләү кеүек мөһим мәсьәләләр партия йыйылыштарында тикшерелмәйҙәр. Йәш коммунистар йыйылыштарҙы әҙерләү эшенә йәлеп ителмәйҙәр, хатта улар көн тәртибендәге мәсьәләләр менән дә таныштырылмайҙар.

Райком работниктары урындарға барғанда ла партия ойошмаларының эше менән һирәк танышалар, уларға ярҙам итмәйҙәр. Райкомдың ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге мөдире иптәш Макаров бер ғариза тикшереү буйынса ике көн Шак совхозында була. Ләкин партия ойошмаһының эшенә күҙ һалмай, хатта уның секретаре менән дә һөйләшмәйенсә ҡайтып китә.

Партия ойошмалары секретарҙарының семинарҙарында йәш коммунистар, бигерәк тә кандидаттар менән эшләү мәсьәләһе бер вакытта ла тикшерелгәне юҡ. Ошолай булғанлыҡтан, һуңында, ВКП(б) членлегенә кандидаттар менән эшләүгә тәүге ойошмаларҙа тейешле иғтибар бирелмәүе ғәжәп түгел. Районда кандидаттарҙың 85 проценты кандидатлыҡ стаждары үтеп киткән.

Йәш коммунистарҙың теоретик белемдәрен күтәреүҙә ярҙам итмәү ВКП(б) райкомының ҙур етешһеҙлеге булып тора. Үҙаллы политик белем кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә эшләүсе ВКП(б) члендәренә һәм кандидаттарына бер төрлө лә ярҙам күрһәтелмәй. Улар өсөн консультациялар, лекциялар ойошторолмай.

Райком һәм уның агитация-пропаганда бүлеге политик мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Уларҙың эше тикшерелмәй, пропагандисттар өсөн семинарҙар үткәрелмәй. «Победа», «Красный партизан» колхозларындағы политик мәктәптәрҙә занятиелар бер генә тапҡыр үткәрелгән дә, шуның менән үк бөткән.

Йәш коммунистарҙы тәрбиәләүҙә лекция пропагандаһы файҙаланылмай. Доклад, лекциялар ойоштороуҙа һис бер система юҡ. Мәҫәлән, 1947 йылда үткәрелгән 32 лекцияның ВКП(б) тарихы буйынса бары бер генә лекция уҡылған.

ВКП(б) райкомы, партияға яңы ҡабул ителеүселәр менән эште көсәйтеү урынына, тупаҫ рәүештә администрировать итеү юлына баҫҡан. 1947 йылда райком бюроһы 36 коммунисҡа шелтә биргән, 15 кешене партиянан сығарған. Райкомдың эш практикаһында был хәл әле лә дауам итә.

Хәҙер, партия үҙ члендәрен политик тәрбиәләүгә ҙур иғтибарҙы биргән ваҡытта, йәш коммунистар менән эшләү айырыуса мөһим әһәмиәт ҡаҙана. ВКП(б)-ның Зиянчура райкомы работниктәре быны иҫтә тоторға һәм йәш коммунистарҙы тәрбиәләү тураһында партия өлкә конференцияһының күрһәтмәләрен теүәл үтәргә бурыслылар.

Г. Вахитов.

Колхозды ныҡытыу өсөн көрәш

Алтайлыларҙың 1948 йылда ауыл хужалығында яңы еңеүҙәргә өлгәшеү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышы йәйелдереү сакырыуына Мәсетле районы Калинин исемендәге колхоз члендәре берҙәм рәүештә ҡушылдылар. Партия ойошмаһы ауыл эшсәндәренең был патриотик хәрәкәтенең башында тора.

Алтайлыларҙың мөрәжәғәтен тикшереүгә арналған партия йыйылышында коммунистар быйыл сәсеү майҙанын, үткән йылға ҡарағанда, 23 процентҡа арттырыу бурысын ҡуйҙылар. Быны үтәү өсөн колхоз правлениеһына эске мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланырға тәҡдим итеп

Сәсеү орлоғо етмәй ине. Коммунистар уны һатып алыуҙы ойоштороу һәм колхозсыларҙан бурысҡа алып тороу юлы менән орлоҡ фондын тулыландырырға ҡарар иттеләр. Был эштә коммунистар үҙҙәре өлгө күрһәттеләр. Шул уҡ йыйылышта коммунистарҙан Агзамов 2 центнер, Валиев — 1,4, Дауытшин — 1,2, Ғариева — 1 һәм Закирова — 0,7 центнер орлоҡ бирергә булдылар. Коммунистарҙың был тәҡдимдәрен колхозсылар бер күңелдән хуплап ҡаршы алдылар. Колхозсыларҙан Сафин Сәбир 2 центнер, Сафин Ғәлимйән — 1,5 һәм Абдуллин Дилмөхәмәт 1 центнер орлоҡ бирҙеләр. Күп тә үтмәне, колхозсыларҙан 31 центнер сәсеү орлоғо йыйнап алынды. Һатып алыу юлы менән дә байтаҡ орлоҡ тупланды. Хәҙер колхозда бөтә сәсеү майҙанын ҡапларлыҡ орлоҡ бар.

Коммунистар ҡышҡы агротехник саралар планын үтәү һәм ауыл хужалығы машиналарын ремонтлау эштәрен дә өлгәлә тамамлауҙы тәьмин иттеләр.

Х. Мусин.

Кустовой семинарҙар

ВКП(б)-ның Воскресен райкомы тәүге партия ойошмалары әргәһендәге агитколлективтәр составын ҡабаттан ҡарап сыҡты. Агитаторҙар итеп алдынғы әҙерлекле коммунистар, комсомолецтар һәм партияһыҙ большевиктар һайлап алынды. Агитаторҙар баҫыусылыҡ бригадаларына, звеноларға, трактор бригадаларына һәм фермаларға беркетеләләр.

Районда ошо көндәрҙә агитаторҙар өсөн кустовой семинарҙар үткәрелде. Семинарҙарҙы үткәреүҙә райкомдың пропаганда бүлеге мөдире һәм пропагандистар етәкселек итте. Семинарҙарҙа ҡатнашыусылар 1947 йылғы хужалыҡ эштәренең йомғаҡтары һәм яҙғы сәсеү осоронда агитаторҙарҙың бурыстары тураһындағы доклад һәм халыҡ-ара хәл тураһында лекция тыңланылар. Доклад һәм лекциянан һуң агитаторҙар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Райондың колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре ваҡытында хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эш алып барыу өсөн 260 агитатор һайлап алынды. Улар хәҙер эшкә башланылар.

Н. Дауытов, ВКП(б) райкомының пропагандисе.

Эшселәрҙең политик уҡыуҙары

Партия ойошмаһы секретаре иптәш Журавлев булған заводта эшселәрҙең идея-политик кимәлдәрен күтәреүгә ҙур әһәмиәт бирәләр. Мастер Стрелков етәкселек иткән цехта бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 6 түңәрәк эшен тамамланы. Бында 100 эшсе уҡыны.

Түңәрәктәр менән политик әҙерлекле коммунистар етәкселек итәләр. Завод партия ойошмаһы түңәрәктәрҙә уҡытыусыларға семинарҙарҙы даими үткәрә.

Агитаторҙар звеноларҙа булмайҙар

«Ҡыҙыл юл» колхозы һуғыштан һуң һиҙелерлек рәүештә алға атлаусы колхоздарҙың береһе. Колхоз йылдан-йыл ныҡый. Юғары урожай өсөн көрәш көсәйгәндән-көсәйә бара. Мәхмүтова Мәғсүмә звеноһы үҙған йыл 29 гектар арыштың һәр бер гектарынан 30,4 центнер урожай алды.

Шулай уҡ 1948 йыл урожайы өсөн дә ныҡлы фундамент һалынып ҡалынды. Яҡшы итеп эшкәртеп 320 гектар арыш сәселде (үҙған йылға ҡарағанда 90 гектарға артыҡ). Бөтә майҙанға етерлек сәсеү орлоғо тупланып, таҙартылып, кондицияға килтерелеп ҡуйылған. Быйыл колхоз бойҙайҙы, үҙған йылға ҡарағанда, ике тапҡырға артығыраҡ сәсәсәк.

Алтайлыларҙың иптәш Сталинға яҙған хатын колхозсылар ҙур күтәренкелек менән өйрәнделәр һәм ҙур йөкләмәләр алдылар. Мәхмүтова Мәғсүмә звеноһы 26 гектар арыштың һәр гектарынан 32-шәр центнер, 10 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 26-шар центнер бойҙай алырға вәғәҙә бирҙе. Колхозсылар бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 20-шәр центнер, ә йөҙ гектар арыштың һәр гектарынан 30-ар центнер урожай алыу өсөн көрәшергә булдылар.

Күреһегеҙ, алынған йөкләмәләр ҙур һәм яуаплылар. Был йөкләмәләрҙе үтәү өсөн колхозсыларҙы фидакәр эшкә ойошторорға кәрәк. Бының өсөн тәүге партия ойошмаһы халыҡ араһында массовый-политик эште киң йәйелдерергә тейеш ине. Ләкин ғәмәлдә эш былай түгел.

Урындағы Советтарға һайлауҙар үткәндән һуң бында агит-массовый эш бөтөнләй туҡталып ҡалды. Был эштә иң ҙур ғәйеп тәүге партия ойошмаһында һәм уның секретаре иптәш Ғилфанов Мосаунрҙа.

Колхозда клуб, ауыл Советe эргәһендә уҡыу өйө бар. Уҡыу өйө мөдире иптәш Ғилфанова Сәлихә эшкә аҙнаға бер тапҡыр ғына сыға. Алынған газета, журналдар халыҡҡа барып етмәй. Клубта, уҡыу өйөндә колхозсылар өсөн беседа, доклад һәм лекциялар уҡылмай. Агитаторҙар бына бер нисә ай инде звеноларға, бригадаларға барып күренгәндәре лә юҡ.

Мәхмүтова Мәғсүмә звеноһына беркетелгән агитатор Шәмсетдинова Мөнәүәрә был звеноның составын, ниндәй йөкләмәләр алғанын да белмәй. СССР Верховный Советe Президиумының игенселәргә юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы Указы колхозсыларға уҡып аңлатылмай. Был ғына ла түгел, күп кенә агитаторҙар үҙҙәре политик яҡтан наҙандар, белемдәрен арттырмайҙар, газета, журналдар уҡымайҙар. Бындай «агитаторҙарҙан» ниндәй эш көтергә мөмкин? Уҡытыусы агитатор Кириллова сыуаш колхозсылары араһында әсә телендә бер ниндәй ҙә массовый эш алып бармай. Партия ойошмаһы агитаторҙарҙы таратып ебәргән, үҙ тирәһенә актив тупламаған. Колхоз стена газетаһын иптәш Әхәтова Рәшиҙә бер үҙе генә сығара.

Агитацион массовый эштең ташландыҡ хәлдә булыуын Шаран районының башҡа колхоздарында ла күрергә була. Агит-массовый эш бигерәк тә Триключа, Ямалыбаш һәм Дүртөйлө ауыл Советтәре колхоздарында насар ойошторолған.

Шаран район колхоздары ауыл хужалығы өлкәһендә 6—7 йыл буйы һөшеп килгән өҙөклөктән быйыл сығырға тейештәр. Масса араһында политик ағартыу эшен тейешле кимәлгә күтәрмәй тороп, был ҙур эштәрҙе башҡарып булмаясаҡ. ВКП(б) райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге (мөдире Валиева) һәм райисполкомдың культура-ағартыу бүлеге (мөдире Афанасьев) һис кисектермәйенсә агит-массовый эште йәнләндереп ебәрергә тейештәр. Тиҙҙән яҙғы баҫыу эштәре башланасаҡ. Агитаторҙар һәр ваҡыт халыҡ менән бергә булып, улар араһында эшләргә, баҫыуҙа социалистик ярышты ойоштороусылар булырға тейештәр.

И. Абдуллин.

ЭСКЕ МӨМКИНЛЕКТӘРҘЕ, КОЛЛЕКТИВТӘРҘЕҢ ҺӘЛӘТЛЕГЕН БИШ ЙЫЛЛЫКТЫ ДҮРТ ЙЫЛДА ҮТӘҮГӘ ТУПЛАРҒА

Тағы ла күберәк накоплениеләр бирәйек

Промышленность предприятиеларе ни тиклем рентабелле эшләһәләр һәм государствоға ни тиклем күберәк накоплениелар бирһәләр, яңы биш йыллыҡ планда ҡаралған бурыстар ҙа шул тиклем уңышлыраҡ тормошҡа ашырыласаҡ. Бына шуның өсөн дә беҙҙең яҙыу машиналары заводы коллективы Мәскәү ҡалаһының алдынғы предприятиеларенең государствонан дотация алмайынса эшләүгә күсеү тураһындағы инициативаларын ҡайнар рәүештә хуплап ҡаршыланы һәм государствоға тағы ла күберәк накоплениелар биреү бурысын ҡуйҙы.

Коллектив ленинградлыларҙың өлгөһендә биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә 1947 йылда производство программаһын үтәү һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү буйынса уңышлы һөҙөмтәләргә ирешә алды. Үткән йылдың планы срогынан күп алда тамамланып, йыл аҙағына пландан тыш 163 яҙыу машинаһы сығарылды. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 17 процентҡа кәметелде һәм накоплениелар заданиеһе 130 процентҡа үтәлде. Шулай итеп, завод бер йылда государствоға бер миллион һумдан артығыраҡ файҙа бирҙе.

Беҙҙең завод ағымдағы йылда илебеҙгә пландан тыш 200 дана яҙыу машиналары эшләп сығарырға һәм кәм тигәндә 2 миллион һум файҙа бирергә тигән йөкләмә алды. Бының өсөн эске мөмкинлектәр иҫәпкә алынып, ойоштороу-техник саралар планы төҙөлдө. Техник иҫәп менән төҙәлгән план һәр бер станок-агрегатҡа һәм эш урындарына еткерелде.

Быларҙың бөтәһе лә беҙгә оборудованиеларҙың тулы эшләүенә, деталдәрҙе комплектлы эшләп сығарыу өсөн уларҙы ҡайтанан ҡоралландырыуға мөмкинлек тыуҙырҙы. Ошо нигеҙҙә цехтарҙың һәм тотошо менән заводтың пландарын үтәү тәьмин ителә.

Коллектив үҙенең өҫтөнә алған йөкләмәләрен намыҫлы рәүештә үтәү өсөн бөтә тырышлығын һалып эшләй. Завод беренсе квартал планын срогынан ун көн алда арттырып үтәне. Тик март айында ғына 87 урынына 105 яҙыу машинаһы эшләп сығарылды.

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең «Производство планы ул миллиондарса кешеләрҙең йәнле һәм практик эшмәкәрлеге, уларҙың хеҙмәткә ихтыяры, уларҙың планды үтәүгә булған теләге»,—тигән күрһәтмәһен беҙ һәр ваҡыт хәтеребеҙҙә тотабыҙ. Бына шуға күрә лә беҙҙең алған социалистик йөкләмәбеҙ уға ҡул ҡуйыусы эшселәргә генә түгел, ә бәлки производство командирҙәре өсөн дә ныҡлы закон булып әүерелде. Ошоға ҡарата алынған социалистик йөкләмәләрҙе үтәүҙе тәьмин итеү өсөн мастерҙарға һәм цех начальниктарына үҙ эштәрен үҙгәртеп ҡорорға, эште яңыса планлаштырырға тура килде. Беҙгә техниканы үҙләштереүҙә рационализаторҙарыбыҙ ҙур булышлыҡ күрһәтәләр.

Йылдың икенсе яртыһында завод камиллаштерелгән яҙыу машиналары (йәғни дүртенсе моделдән бишенсе моделде) эшләп сығарыуға күсәсәк. Бына тиклем машиналарҙың корпусы суйындан ҡойоп эшләнелһә, ә яңы моделдең корпусы алюминийҙан торасаҡ һәм лента перемоткаһы автоматик буласаҡ һәм башҡа деталдәр ҙә камиллаштерелә. Әлек машинаға ҡуйыла торған масштаб линейкалары һәр бер данаһы 30 һум менән Мәскәүҙән алдырылһа, хәҙер ул заводтың үҙендә етештерелә һәм хаҡы 9 һум 50 тинға тура килә. Шулай уҡ хәҙер хәреф клавиштәре лә заводта етештерелә. Был һәм башҡа күп тәҙбирҙәрҙе тормошҡа ашырыу продукцияның үҙенә төшөү хаҡын байтаҡ кәметеүгә һәм ҙур суммала экономия алыуға мөмкинлек бирҙе.

Завод коллективы биш йыллыҡты дүрт йылда уңышлы тамамлау өсөн социалистик ярышты һәм производство новаторҙары хәрәкәтен тағы ла киңерәк йәйелдереп ебәрәсәк.

А. Ракитин.
Өфө яҙыу машиналары заводы директоры.

Яңы техника һәм нефтсе кадрҙар

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың тәүге ике йылында нефть промышленносе Тыуған илебеҙҙә эшләнеп сығарылған яңы ҡеүәтле техника менән нык йыһазландырылды. Бораулау һәм нефть сығарыу пландарының үҫеүе нефтсе кадрҙар әҙерләү һәм уларҙың квалификацияһын күтәреү эшен артабан яҡшыртыуҙы талап итә. Ошоға ярашлы рәүештә «Туймазынефть» тресының уҡыу комбинаты кадрҙар әҙерләүҙе ойоштороп ебәрҙе. Үткән 1947 йылда 1407 кеше — эшсе кадрҙар етештерелде. Стахановсылар мәктәбендә, техминимум курстарында 4848 эшсе уҡып, квалификацияһын күтәрҙе, икенсе профессия алды.

Эшсе кадрҙарын әҙерләү һәм квалификацияларын күтәреүҙә уҡыу комбинатының эшенә трест һәм предприятиеларҙең инженер-техник работниктәре, мастерскойҙар, бригадирҙар, стахановсылар киң ылыҡтырылғандар.

Ағымдағы йылдың тәүге ике айы эсендә 101 яңы эшсе әҙерләнде, шулар иҫәбенән 31 кеше көсәгарлыҡ эшенә өйрәтелде. Хәҙерге көндә комбинатта 390 эшсе уҡый.

Быйыл беренсе булараҡ производство командирҙәре әҙерләүҙе һәм уларҙың квалификацияларын күтәреүҙе ойоштороу беҙҙең эшебеҙҙә айырыуса характерлы булып тора. Бораулау мастерҙәренән һәм торлаҡ төҙәлешә конторaһы бригадирҙәренән 92 кеше үҙҙәренең идея-политик һәм техник белем кимәлен күтәреү занятиеләренә йөрей башланылар.

Юғары квалификациялы операторҙар, мастерҙар иҫәбенән яңынан 12 кеше нефть сығарыу мастерҙәре итеп әҙерләп сығарыласаҡ. Занятиелар башланды инде.

Мастерҙар, бригадирҙар махсус дисциплинанан тыш, ВКП(б) тарихен, рус телен, математика һәм физика фәндәрен үтәсәктәр. Идея-политик һәм техник белемдәренең кимәлен күтәреү буйынса трест һәм предприятиеларҙең етәксе работниктәренән 46 кеше менән регуляр рәүештә занятиелар үткәрелеп килә. Курста ҙур производство тәжрибәһе булған юғары квалификациялы инженер-техник работниктәр һәм мәктәптәрҙең преподавателдәре уҡыталар.

Промыселдәрҙең алдынғы мастерҙәре, стахановсылары Куприянов, Балабанов, Кнутов, Алексеев иптәштәрҙең эш тәжрибәләрен башҡаларға күсереү уларҙың конференцияларҙа доклад менән сығыш яһауҙары, урындағы һәм өлкә матбуғатында уларҙың эш методтарын яҡтыртыу юлы менән алып барылды. Ошо йылдың икенсе кварталынан алып был алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен башҡаларға күсереү өсөн эшселәрҙе стахановсылар мәктәбендә уҡытыу киң рәүештә ойошторолаcаҡ. Стахановсылар мәктәбендә уҡыуға беренсе нәүбәттә, нормаларын үтәмәүсе, күп брак биреүсе эшселәр ылыҡтырыласаҡтар. Хәҙер нормаларҙың үтәлмәү сәбәптәрен аныҡлау эше үткәрелә. Был серьез бурысты тормошҡа ашырыуҙа беҙгә предприятиеларҙең етәкселәре, инженер-техник работниктәре, стахановсылар булышлыҡ күрһәтәләр.

Х. Сиразетдинов,
«Туймазынефть» тресының эшсе кадрҙар әҙерләү буйынса инженеры.

Өфө яҙыу машиналары заводының йыйыу цехы март айында производство планын 118 процентҡа үтәне.
Һүрәттә: цехтың алдынғы стахановкаһы иптәш Н. Г. Пискарева яҙыу машиналары йыйыу өҫтөндә. Г. Буравин фотоһы.

Һал ағыҙыу сезоны башланыу алдынан

Зарарлы тынысланыу

— Һал ағыҙыу эшенә нисә кеше ебәрәһегеҙ?

— Исемлек бар, ләкин колхозсыларға белдерелмәгән әле.

Айдо ауыл Советының председателе иптәш Кузнецов беҙҙең һорауыбыҙға шулай тип яуап бирҙе.

Һал ағыҙыу эше башланыуға һанаулы ғына көндәр ҡалыуға ҡарамаҫтан, колхозсыларға һал ағыҙыу эшенә барасаҡтарын һаман да белдермәү ауыл Советы етәкселәренең был мөһим эшкә юл ҡуйғыһыҙ яуапһыҙ ҡарағанлыҡтары тураһында һөйләй.

Ҡариҙел районының башҡа күп кенә ауыл Советтәрендә һәм колхоздарында ла был мөһим эшкә һалҡын ҡарайҙар. Райондан Юрәҙән леспромхозына ебәрелергә тейеш булған 150 колхозсының исемлеге лә төҙөлөп бөтмәгә, исемлеккә 13 йәш үҫмерҙең индерелеүе шуны асыҡ күрһәтә. Дыуан, Салауат райондарында ла һал ағыҙыуға эшселәр ебәреүгә яуапһыҙ ҡарайҙар.

— Һал ағыҙыуға бөтәһе лә әҙер.

Юрәҙән һал ағыҙыу конторaһының начальнигы иптәш Доронин һәм леспромхоз етәкселәре лә шулай тиҙәр. Ләкин фактылар уның киреһен күрһәтәләр. 10 мең кубометрҙан артыҡ ағас һаллау урынына ташылмаған, 20 тонна юҡа, 200 дана багор етешмәй. Ә һалды юҡаһыҙ бәйләп булмай бит. ОРС начальнигы иптәш Самойлов һалсылар өсөн етерлек тиҙләтеп азыҡ-түлек һәм промтауар килтереү эшен тәьмин итмәгән.

Ысын хәл һал ағыҙыу конторaһы һәм леспромхоз етәкселәренә һис тынысланырға хоҡуҡ бирмәй, ә әҙерлек эштәрен йылдам тамамлау өсөн көндөң һәр бер сәғәтен файҙаланыуҙы талап итә. Сөнки әҙерлекте һис кисекмәҫтән тамамлағанда, эшсе көстәрен тулыһынса һәм ойошҡан рәүештә ебәргәндә генә 126 мең кубометр ағасты һаллап ағыҙыу эшен уңышлы башҡарырға мөмкин.

Ғ. Исмәғилов

Связистәр ярышҡа сыҡтылар

Ошо көндәрҙә Ҡыйғы район связь работниктәренең производство кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмә яҙғы сәсеүҙе хеҙмәтләндереүгә әҙерлектең торошо тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе.

Район связь бүлеге (начальнигы иптәш Редкин) работниктәре колхоз ауылы алдында торған был иң яуаплы политик-хужалыҡ кампанияһын хеҙмәтләндереүгә ҡарата эшлекле рәүештә әҙерләнәләр. Линия монтерҙары Хужин, Шарифуллин иптәштәр телефон линияларының төҙөклектәрен тикшереп сыҡтылар һәм хәҙер Туғыҙлы ауыл Советe менән район үҙәге араһындағы телефон бәйләнешен яҙғы сәсеү башланғанға тиклем эксплоатацияға тапшырыу өсөн бөтә көстәрен һалып эшләйҙәр.

Радиоузелдең техниге иптәш Һадыев Мәскәү һәм Өфө радиотапшырыуҙарын телефон аша колхоздарға биреүҙе ойоштора. Яҙғы сәсеүгә бәйләнешле корреспонденцияларҙы эйәләренә беренсе нәүбәттә тапшырырға һәм ҡабул итеүҙе өлгәлә ойошторорға булдылар. Район-ара һәм колхоз почталарының регуляр йөрөүен тәьмин итеү маҡсатында транспорт инвентарҙәре алдан ремонтланып, кешеләр һәм аттар бүленеп ҡуйылды.

Комсомол ойошмаһының (секретаре иптәш Ханов) инициативаһы менән район үҙәгендәге ос колхозда сәсеү осоронда пенсионерҙарҙы һәм пособие алыусыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн күсмә кассалар ойошторолдо. Күсмә кассалар менән бүлектең өлкән почта агенте комсомолка иптәш Рауза Сафина етәкселек итә.

«Союзпечаттең» район вәкиле иптәш Әхмәтьянова 4602 дана төрлө газета һәм журналдарҙы хужаларына туранан-тура баҫыуҙарға илтеп тапшырыуҙы ойошторорға булды. Район связь бүлеге работниктәре яҙғы сәсеүҙә эшләүселәрҙе өлгәлә хеҙмәтләндереү буйынса Салауат районы связистәрен социалистик ярышҡа саҡырҙылар.

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ)

Матбуғат күҙәтеү

Газета һәм алдынғыларҙың эш тәжрибәләре

Ҡыйғы районы бер нисә тапҡыр инде общественный малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукты биреүсәнлеген күтәреү буйынса ярышта республикала еңеүсе булып табылды. Бында малсылыҡтың бик яҡшы, алдынғы работниктәре бар. Уларҙың эш тәжрибәләре социалистик малсылыҡты артабан үҫтереү өсөн баһалап бөтөргөһөҙ резерв булып тора. Алдынғылар — үҙҙәренең эштәрендә яңы методты киң ҡулланып, бай тәжрибәне совет фәненең яңы ҡаҙаныштары менән ҡыйыу бәйләп алып барыусы хеҙмәт новаторҙары улар.

ВКП(б)-ның Ҡыйғы район комитеты һәм район Советы башҡарма комитетының органы «Коммунизмға» газетаһы (редакторы Зиннәт Вәлиев) общественный малсылыҡты үҫтереү һәм уның продукты биреүсәнлеген күтәреү өсөн көрәштә тупланған тәжрибәне киң пропагандаларға тейеш ине. Сөнки большевистик матбуғаттың алдынғы тәжрибәне пропагандалау, популярлаштырыуҙан да маҡтаулыраҡ һәм мөһимерәк бурысы юҡ.

Үкенескә ҡаршы, «Коммунизмға» газетаһының работниктәре был ҙур һәм яуаплы бурысты баһалап еткермәйҙәр. Был газета малсылыҡ алдынғылары тураһында бөтөнләй онотҡан, тиһәк тә хата булмаҫ ине. Ул малсылыҡ работниктәрен колхоз фермаларындағы ҡыйыу новаторҙар миҫалында, уларҙың ҡиммәтле тәжрибәләре нигеҙендә тәрбиәләмәй. Һоҡланғыс эш өлгөләре күрһәткән һыйыр һауыусылар, һарыҡ ҡараусылар һәм башҡа малдарҙы тәрбиәләүселәр тураһында газета яҙмай. Уның биттәрендә һирәк-һирәк кенә сыҡҡан хәбәрҙәр ҙә информацион характерҙа ғына булалар. Алдынғылар тарафынан тупланған бай тәжрибә асып бирелмәй, уларҙы бөтә халыҡ достояниеһына әйләндереү буйынса хеҙмәт күрһәтелмәй. Ҡыйғы районында ла общественный малсылыҡты үҫтереүҙә еңеүсе булып алмаған колхоздар ҙа, эште дөрөҫ ойоштора алмаған малсылыҡ фермалары ла бар әле. Уларҙы алдынғылар тарафынан тупланған тәжрибәгә өйрәтергә кәрәк.

Газетаның 10 гинуарҙа сыҡҡан номерында Киров исемендәге колхоздың бөтә районға танылған һыйыр һауыусыһы Ғаян Нуркаева тураһында «Пландан тыш 3000 литр һөт» тигән баш аҫтында 15 юллыҡ хәбәр бирелә. Бында:

«1947 йылда иптәш Нуркаева үҙенә беркетелгән һыйырҙарҙан һауылып алынырға тейеш булған 8000 литр һөт планын 11000 литрға еткереп үтәне, пландан тыш 3000 литр һөт һауып алды. Ул үҙ һыйырҙарынан алынған 9 быҙауҙы юғалтыуһыҙ ҡарап үҫтерҙе» тип әйтелә (һөйләм төҙөлөшө үҙгәртелмәйенсә алына). Иптәш Нуркаева был уңышҡа нисек, ниндәй юлдар менән өлгәшкән? Газета уҡыусыға был асыҡ түгел.

Газетаның 17 мартта баҫылған номерында иптәш Нуркаева тураһында тағы ла бер информация бирелә. Газета түбәндәгеләрҙе хәбәр итә:

«Алдынғы доярка Нуркаева Ғаян үткән йылда һәр бер һауын һыйырҙан 1550 литр һөт һауып алды — һөт һауыу планын 550 литрға арттырып үтәне һәм 9 һыйырҙан 12 быҙау алып үҫтерҙе...

Ғаян апа ирешелгән уңыштар менән генә тынысланып ҡалманы. Быйыл ул һәр бер һауын һыйырҙан 2000 литр һөт һауып алырға һәм быҙауҙарҙы юғалтыуһыҙ тәрбиәләп үҫтерергә һүҙ бирҙе».

Исмаһам, икенсе тапҡыр яҙғанда иптәш Нуркаеваның эш тәжрибәһен яҡтыртыуға газетаға киңерәк урын бүлергә һәм уҡыусыларға аңлайышлы тел менән һөйләп бирергә кәрәк ине. Ләкин редакция быны эшләмәй.

«Коммунизмға» газетаһы малсылыҡ алдынғыларының хеҙмәттәрен уларҙың ҡиммәтле тәжрибәләрендә түгел, бәлки өҫтәмә хеҙмәт хаҡы алыуҙарында ғына күрә.

Бына «Намыҫлы хеҙмәт емеше» тигән хәбәрҙе алайыҡ. Бында «1 май» колхозының һарыҡ ҡараусыһы иптәш Солтанова тураһында былай яҙыла:

«...Үҙенә беркетелгән 63 баш инә һарыҡтан 84 бәрәс алып тәрбиәләп үҫтерҙе...

Уға өҫтәмә түләү тәртибендә 5 баш һарыҡ һәм 1 килограмм 200 грамм йөн бирелде». Өҫтәмә түләү — намыҫлы хеҙмәт өсөн мөһим дәртләндереү сараһы булып тора. Ул турала яҙырға кәрәк. Ләкин алдынғыларҙың хеҙмәтен өҫтәмә түләүгә генә ҡайтарып ҡалдырыу, уларҙың тәжрибәләре тураһында әйтмәү — большевистик матбуғат өсөн ғәфү ителерлек хата түгел.

«Коммунизмға» газетаһы баҫыу алдынғыларының тәжрибәләрен яҡтыртыуҙа ла яуапһыҙ ҡарай. Уның гинуар—март айҙарында баҫылған номерҙарын ҡарап сыҡҡанда, районда бер генә юғары урожай мастеры, яҙғы сәсеүгә өлгөлө әҙерләнеүсе бер генә колхоз, бригада һәм звено ла юҡ икәнме? тигән һорау тыуа. Быға ышаныу ауыр. Бөтә был газетаның алдынғылар тәжрибәһен күрмәүе менән аңлатыла.

«Коммунизмға» газетаһының работниктәре үҙҙәренең был серьез хаталарын тиҙ төҙәтергә, колхозсыларҙы ауыл хужалығы алдынғыларының өлгөләрендә, уларҙың бай тәжрибәләре нигеҙендә тәрбиәләүгә партия ойошмаларына ярҙам итергә тейештәр.

Баҫыу эштәрен һәр бер колхозда ойошҡан рәүештә башларға!

Ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландыралар

«Труд» колхозы (Өфө районы) баҫыуҙарында ужымдарҙы яҙ тәрбиәләү эше башланды. Быйыл һәр гектарҙан 25-әр центнер урожай алыуҙы бурыс итеп ҡуйған Зоя Кириллова һәм Анна Уварова иптәштәрҙең звенолары 20 гектар ужым сәсеүлеген аҙыҡландырҙылар. Ашлама өсөн көл һәм серәгәң тиреҫ ҡулланылды. Беренсе науб әткә ҡалҡыу урындағы ужымдар аҙыҡландырылды. Шул уҡ ваҡытта талап ителгән участкаларҙа ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыу саралары үткәрелде.

Өфө тәжрибә баҫыуында ла ужымдарҙы тәрбиәләү эше үткәрелә. Һәр гектарҙан 40-ар центнер арыш урожайы алырға һүҙ биргән Мария Муратова һәм Тәзимә Хафизова иптәштәрҙең звенолары ужымдарҙы минераль ашламалар менән аҙыҡландыралар.

М. Фәтҡуллин.

Баҫыуҙарҙа эш ҡыҙа

ДӘҮЛӘКӘН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Бик-ҡарамалы» колхозында иптәш Әюпов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эшен йәйелдерҙе. Бригадала Ғәрәева, Әмирова һәм Хәрисова иптәштәрҙең звенолары тәүге ике көндә 10 гектар ужым майҙанында аҙыҡландырыуҙы үткәрҙеләр.

Шулай уҡ «Яңы таң», «Новый быт» һәм башҡа колхоздарҙа ла ужымдарҙы аҙыҡландырыу эше ҡыҙыу бара. Районда инде 300 гектарҙан күберәк майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды.

Ғ. Идрисов.

Тәүге гектарҙар

УРГЕ ҠЫЙҒЫ. (Телефон аша). «Красный Урал» колхозы члендары яҙғы яҡшы әҙерлек менән ҡаршыландылар. Тәүге мөмкинлектәр тыуыу менән баҫыу эштәре башланды. Кашапова, Сафарова, Мортазина, Исхакова иптәштәрҙең звенолары үҙ участкаларындағы ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эшен яҡшы ойоштороҙолар.

«Һабансы», «Коминтерн», Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре лә тәүге гектар ужымдарҙы аҙыҡландырҙылар.

Һаҡмар совхозы сәсеүгә тулы әҙерлек менән башлай

Ошо көндәрҙә Һаҡмар совхозында сәсеүгә әҙерлекте тикшереү уҙғарылды. Государство комиссияһы тракторҙарға һәм тағылма инвентарҙарға уҙғарылған ремонттың сифатын яҡшы, тип тапты. Бөтә трактор бригадалары ла тәжрибәле трактористар, прицепщиктар менән тулыһынса комплектовать ителделәр. Һәр бер трактор кәрәкле инструменттар, заправка инвентарҙары һәм төндә эшләү өсөн электр яҡтыһы менән тәьмин ителде.

— Беҙҙең совхоз баҫыуҙарында бер генә трактор ҙа эшләмәй ултырмаясаҡ, беҙ уларҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланасаҡбыҙ,—ти ҙур ышаныс менән, совхоз директоры иптәш Черкасов.

Яҙғы баҫыу эштәре өсөн тракторҙарға 585 центнер яғыулыҡ һәм майлау материалдары әҙерләнеп, трактор бригадалары эшләй торған урындарға ташылып ҡуйылған.

— Минең йөкләмә — 1200 гектар. Бары тик яҙғы сәсеү осоронда ғына 150 гектар ер һөрәсәкмен, — ти тракторист Алексей Алеев. Пыхтин, Черепахин, Руденко иптәштәр ҙә ошондай уҡ йөкләмәләр алдылар.

Быйыл совхоз 1185 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларын сәсеүҙе планлаштырҙы. Бөтә майҙанға етерлек сәсеү орлоғо тупланған, тазартылған, сыҡҡанлығы тикшерелде. Был эштә совхозға 900 центнер орлоҡ биреп, ҙур ярҙам күрһәтелде.

Яҙғы баҫыу эштәре буйынса конкрет эш пландары төҙөлгән, совхоз работниктәре араһында ныҡлап өйрәнелде. Һәр бер һабансы, сәсеүсе үҙенең ҡайһы бригадала, ниндәй эш башҡарасағын яҡшы белә.

Бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса 3 звено ойошторолған, улар 120 гектар майҙанда яҙғы бойҙай сәсәсәктәр. Ҡалған 4 звеноға 12 гектар майҙанда картуф үҫтереү бурысы тапшырылды. Бөтә звенолар ҙа үҙҙәренә беркетелгән участкала юғары урожай үҫтереү буйынса йөкләмәләр алып, социалистик ярышҡа сыҡтылар.

К. Сафин.

Иптәш Зариновтың йөкләмәһе

Ленин орденле Дүртөйлө МТС-ы механизаторҙары СССР Верховный Советы Президиумының Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларын ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһындағы Указын ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар.

Указға арналған митингыла сығыш яһаусылар Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланған иптәш Заринов 1947 йылда шартлы һәр бер тракторға 712 гектар ер эшкәртеп, сезон заданиеһын 180 процентҡа үтәгән һәм уның трактор бригадаһы эшләгән баҫыуҙарҙа юғары урожай алыуға булышлыҡ иткән тураһында һөйләнеләр.

Хөкүмәтебеҙҙең һәм партиябыҙҙың намыҫлы хеҙмәтте юғары баһалауына яуап итеп, митингыла иптәш Заринов ул сығыш яһаны.

Ул иң тәүҙә трактор бригадаһының сәсеүгә сығыу өсөн тулыһынса әҙер булыуын белдерҙе. Уның һуң тракторҙарының беркетелгән колхозға күптән уҡ иттеллеп күсеп килтерелгәнен әйтте һәм 1948 йылда шартлы трактор менән 800 гектар ер эшкәртергә йөкләмә алды.

МТС-та яҙғы сәсеүгә ойошҡан рәүештә башлау һәм уны ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн бөтә саралар күрелә.

Ғ. Хәснәтдинов.

Юғары урожай өсөн көрәш башланды

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Юғары урожай мастерҙарының һоҡландырғыс эш тәжрибәләре бар. «Бүләк тау» колхозы агрономы иптәш Калимуллин, — яҙғы ҡар һыуҙарын тотоп ҡалыуҙың һәм ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙың ҙур әһәмиәте бар, тип иҫәпләй. Был тәжрибәне быйыл киңерәк файҙаланасаҡбыҙ.

Иптәш Калимуллин үткән йыл юғары урожай участкаһында үҙе лә тәжрибә яһаны. Ҡар һыуҙары тотолған һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелгән участкала һәр бер гектарҙан 10—11-әр центнер өҫтәмә урожай алынды.

Ошо тәжрибә нигеҙендә «Бүләк тау» ауыл хужалығы артеле члендәре быйыл 100 гектар ужым сәсеүлегендә ҡар һыуҙары тотоу үткәрҙеләр. 15 апрелдән алып бөтә звенолар ҙа ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы башланылар. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланған Рәшиҙә Садыкова, Мәстүрә Яҡупова иптәштәрҙең звенолары һуңғы 5 көн эсендә 18 гектар ужым сәсеүлеген тиреҫ шыйыҡсаһы менән аҙыҡландырҙылар. Был эш ҡыҙыу дауам итә.

Районда «Балағас күл», «Үрнәк», «Өҫән тамаҡ» кеүек — бөтәһе 22 колхоз ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу эштәренә башланы.

Р. Камалов.

Редакцияға хат

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ ТЕМАҺЫНА ЯҘЫЛҒАН КИТАПТАР КӘРӘК

Быйыл, Маҡар районы колхоздарында игенселек эшен өйрәнеү буйынса ғына 37 түңәрәк эшләйе. Колхозсылар агротехника мәсьәләләре һәм ауыл хужалығы алдынғыларының эш тәжрибәләре менән бик ныҡ ҡыҙыҡһыналар.

Быны ВКП(б)-ның район комитеты һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы исполкомы етәкселәре яҡшы беләләр. Шулай ҙа, районда колхоздарҙы ауыл хужалығы темаһына яҙылған китаптар, брошюралар менән тәьмин итеү саралары күрелмәй. Игенселек һәм малсылыҡ өлкәһендә булған яңылыҡтар, алдынғы тәжрибәләр тураһында яңы сыҡҡан әҙәбиәт Маҡар районы колхоздарына бөтөнләй килмәй тиһәк тә хата булмаҫ.

Билдәле, был хәл, колхоз бригадалары, фермалары эргәһендә ойошторолған түңәрәктәрҙең занятиеләрен тағы ла йөкмәткелерәк итеп алып барыуға мөмкинлек бирмәй. Түңәрәктәрҙә алған белемдәрҙе теоретик тәрәнәйтеүгә лә серьез ҡомасаулыҡ итә.

1947 йылда район үҙәгендә китап магазины асылғайны. Бер йылдан артыҡ ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, ауыл хужалығы эштәре буйынса колхоздарҙа ҡулланма итеп файҙаланырлыҡ бер генә китап та унда килгәне юҡ. Мин был турала райпотребсоюз председателе иптәш Черепанинаға бер нисә тапҡыр мөрәжәғәт итеп ҡараным. Ул минең һорауҙарыма:—беҙ талап иткән китаптар беҙгә килмәйҙәр. Ул хаҡта беҙ кем менән һөйләшергә лә белмәйбеҙ,—тип яуап бирҙе. Был яуаптар үҙҙәре үк сауҙа ойошмаларының әҙәбиәтте массаға еткереү менән ҡыҙыҡһынмауҙарын күрһәтәләр.

Агроном **Л. К. Абдуллин.**

„Ҡыҙыл Башҡортостан" материалдары эҙенән

«БОЗАЯЗДА ЗВЕНОЛАР ОЙОШТОРОУҒА ӘЛЕ БУЛҺА БАШЛАМАҒАНДАР»

Бозаяз район Советы исполкомы председателе иптәш Садиков «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының 34-се номерендә — «Бозаязда звенолар ойоштороуға әле булһа башламағандар» тигән баш аҫтында бирелгән материал буйынса редакцияға түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

— Газетаның сығышы район Советы исполкомы ултырышында ҡаралды. Уның һуң, звенолар ойоштороуҙа ярҙам итеү өсөн колхоздарға райондың яуаплы работниктәре ебәрелде. Бынан тыш, бөтә агрономдарҙың район кәңәшмәһе үткәрелеп, бында ла газеталағы хәбәр тикшерелдә һәм дөрөҫ табылды.

Бөгөнгә көндә, звенолар ойоштороу бөтә колхоздарҙа ла тамамланды. Йыйып әйткәндә, 5706 кешенән торған 528 звено ойошторолдо. Колхоздарҙың производство пландары нигеҙендә уларға баҫыу участкалары бүлеп бирелде. Апрелдең 1-нән 5-нә тиклем, бөтә бригадаларҙың һәм звеноларҙың сәсеүгә әҙерлектәре тикшерелде.

Социалистик ауыл хужалығында яңы уңыштарға

1947 йыл социалистик игенселек үҫеше тарихына даплы биттәрҙең береһе булып инәсәк. Колхоз крәҫтиәндәре, совхоз һәм МТС хеҙмәтсәндәре, ауыл хужалығының бөтә работниктәре игенселекте һәм малсылыҡты алға баҫтырыуға һәм үҫтереүгә бик ҙур эш башҡарҙылар.

1947 йылда сәсеү майҙаны байтаҡ киңәйтелде, бөтә тар малдар һаны үҫте, ауыл хужалығының валовой продукцияһы, 1946 йылға ҡарағанда, 32 процентҡа артты, ә игенселек продукцияһы 48 процентҡа үҫте. Бөртөклө ашлыҡтарҙың урожайлылығы һуғышҡа тиклемгә барып етте. Беҙҙең ауыл хужалығыбыҙҙың уңыштары бигерәк тә шуның өсөн әһәмиәтле булып торалар, сөнки улар ауыр һуғыштан һуң, 1946 йылғы ҡаты ҡоролоҡтан һуң яулап алындылар. Бары тик бөйөк Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә генә беҙҙең колхоздарыбыҙ һәм совхоздарыбыҙ бөтә оҫо ҡыйынлыҡтарҙы уңышлы рәүештә еңеп сыҡтылар һәм социалистик ауыл хужалығының иң мөһим тармаҡтарының әлегәсә күрелмәгән күтәрелешенә өлгәшә алдылар.

Ауыл хужалығының артабан дөйөм күтәрелешенә өлгәшеү — һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың төп бурысы булып тора. 1948 йылда колхоз һәм совхоз производствоһының иң алдынғы тармағын—бөртөклө ашлыҡ хужалығын алға баҫтырыу һәм үҫтереүҙе дауам итергә кәрәк. Сәсеү майҙанын киңәйтергә, яҙғы һәм көҙгө бойҙай, арыш, борсаҡ, арпа һәм дөгө кеүек ҡиммәтле ашлыҡ культураларының урожай биреүсәнлеген күтәрергә кәрәк. Ярма культуралары булған тары һәм ҡара бойҙайҙың урожайын һәм валовой йыйымын арттырыу бик мөһим. Төп фураж культуралары булған һолоноң һәм арпаның урожайын һәм валовой йыйымын күтәреү өсөн дә беҙҙә мөмкинлектәр бик күп.

Колхоз һәм совхоз производствоһының техник яҡтан ныҡ ҡоралланған булыуы, машина-трактор паркын яҡшы ремонтлау һәм кадрҙарҙы яҡшыраҡ итеп әҙерләү өсөн шарттарҙың булыуы, колхоздарҙы һәм совхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуҙа партия һәм совет органдары тарафынан үткәрелгән ҙур эш — былар бөтәһе лә 1948 йылда сәсеү майҙандарын киңәйтеү һәм бөтә бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайын арттырыу буйынса государство планын үтәргә һәм арттырып үтәргә тулы мөмкинлек бирәләр.

1948 йылда СССР-ҙың көньяк-көнсығышында яҙғы бойҙайҙы үҫтереү өсөн айырыуса уңайлы шарттарҙағы илан районларының колхоздары һәм совхоздары яҙғы ҡаты бойҙайҙың иң ҡиммәтле сорттарын етештереүҙе байтаҡ арттырырға тейештәр.

1948 йылда етен үҫтереүҙе байтаҡ арттырыу бурысы тора. Оҙон етен (долгунец) СССР-ҙың Европа өлөшөнөң ҡара тупраҡлы полосаһының бик ҙур зонаһында иң мөһим техник культура булып тора. Етенселек районлары үлән сәсеүҙе арттырыуға һәм дөрөҫ рәүештә үлән сәсеү әйләнештәрен үҙләштереүҙә артта ҡалалар. Ә клевер баҫыуы — етенгә тиклем сәселә торған төп культура ул. Етенселек районлары ер эшкәртеүҙә үлән сәсеү системаһының бөтә сараларын үткәреүҙә алда барырға тейештәр.

1948 йыл ялаңы шәкәр сөгөлдөрө үҫтерелә торған бөтә төп районларҙа шәкәр сөгөлдөрө сәсеү майҙандарын киңәйтеүҙе күҙҙә тота. Ер участкаларын файҙаланыуҙы тәртипкә килтереү, сәсеүлек майҙандары структураһын яҡшыртыу, дөрөҫ сәсеү әйләнештәрен үҙләштереү һәм шәкәр сөгөлдөрөн сәскәндә, плантацияларҙы тәрбиәләгәндә һәм урожай йыйғанда алдынғы агротехниканы киң рәүештә ҡулланыу бурысы тора.

Быйыл йәшелсә һәм картуф үҫтереүселәр алдына йәшелсә культураларының һәм картуфтың сәсеү майҙанын һәм урожайын арттырыу бурысы ҡуйылды. Колхоздарҙа картуфтың юғары урожай биреүсе сорттарын сәсеү майҙанын арттырырға кәрәк.

1948 йылда колхоздар һәм совхоздар үҫә барған малсылыҡ өсөн мал азығы етештереүҙе байтаҡ арттырырға тейештәр. ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының ҡарарҙарына ярашлы рәүештә колхоздарҙа тупаҫ азыҡтарҙы 105 миллион тоннаға тиклем, шул иҫәптән общественный малсылыҡ өсөн — 84 миллион тоннаға тиклем әҙерләргә, 25 миллион тоннаға тиклем силос һалырға кәрәк.

Баҫыуҙа үлән сәсеүҙе үҫтереү буйынса государство планын үтәү — игенселектең дөйөм культураһын, тупраҡтың уңыш биреүсәнлеген күтәреүҙең һәм малсылыҡ өсөн ныҡлы азыҡ базаһы булдырыуҙың иң мөһим шарттарының береһе булып тора. Илебеҙҙең бөтә ауыл хужалығы зоналарында игенселек культураларын күтәреүҙең төп шарты булыуы яғынан күп йыллыҡ үләндәрҙең орлоғон етештереүҙе арттырыуға етди иғтибар бирелергә тейеш.

Оҙаҡ ваҡыттар буйынса тәжрибә менән тикшерелгән билдәле сорттағы үләндәрҙең орлоҡтарын етештереүҙе арттырыу менән бер рәттән, күп йыллыҡ үләндәрҙең яңы сорттарын да индерергә, үлән сәсеүҙе яңы районларға күсерергә кәрәк.

Силос культуралары һәм тамыр ашлыҡтарынан сәсеүлек майҙандары мал азығы культураларының сәсеүлек майҙандары араһында күренекле урын алып торорға тейештәр. Малсылыҡты һәм бигерәк тә һөт биреүсе малдарҙы һәм сусҡасылыҡты йылдам рәүештә алға баҫтырыу һәм артабан үҫтереү һутлы азыҡтар етештереүҙе байтаҡ арттырыуҙы талап итә.

МТС-тарҙың трактор эштәре планы һәм МТС-тарҙы артабан нығытыу менән бәйләнешле бурыстар ауыл хужалығын алға баҫтырыу һәм үҫтереү планының мөһим өлөшөн тәшкил итә. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың икенсе йылында, 1946 йылға ҡарағанда, баҫыуҙа трактор эштәре 29 процентҡа артығыраҡ башҡарылды. 1947 йылда иң һөрөү, ерҙе һөрөү алдынан культивациялау, яҙғы культураларҙы сәсеү, пар күтәреү һәм көҙгө ашлыҡтарҙы сәсеү кеүек иң мөһим трактор эштәренең государство планы арттырып үтәлде.

Биш йыллыҡтың өсөнсө йылында МТС-тар үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа сәсеү майҙандарын артабан киңәйтеүҙә, урожайлылыҡты күтәреүҙә, машина-трактор паркын файҙаланыуҙы яҡшыртыуҙа, трактор эштәренең сифатын күтәреүҙә һәм уларҙы иң яҡшы агротехник срокта үтәүҙә, урожайҙы үҙ ваҡытында йыйып алыуҙа һәм натуралата түләү пландарын үтәүҙә артабан уңыштарға өлгәшергә тейештәр.

МТС-тың колхоз менән яңы типовой договоры — колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыуҙың ҡеүәтле средствоһы булып тора. Тракторҙарҙың төп эштәрен планлаштырыуҙан башҡа, агротехник күрһәткестәр, баҫыу эштәрен эш көндәрендә һәм календарь көндәрҙә үткәреү сроктары — договорҙың мөһим өлөштәре булып тора. Һуңғылары МТС-тың колхоз менән булған өҫтәмә килешеүендә баҫыу эштәре башланыр алдынан уларҙы иң яҡшы агротехник сроктарҙа үткәреү мәҡсәтенән билдәләнә. МТС-тың колхоз алдындағы йөкләмәләре араһында агротехник яҡтан хеҙмәтләндереү, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, производствоны планлаштырыуҙы яҡшыртыуға колхозға даими ярҙам күрһәтеү кеүек йөкләмәләре бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Икенсе яҡтан договор колхозға бик ҙур әһәмиәтле күп кенә бурыстар ҡуя. Уларға колхоздың йәнле тартыу көсөн рентабелле файҙаланыу, баҫыусылыҡ бригадаларының бөтә эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү, государство алдындағы йөкләмәләрҙе үҙ ваҡытында һәм тулыһынса үтәү инә.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары һәм биш йыллыҡ план тураһында Закон ауыл хужалығы работниктәре алдына социалистик малсылыҡ өлкәһендә бик яуаплы бурыстар ҡуйҙы. 1948 йылда колхоздар һәм совхоздар малсылыҡтың бөтә тармаҡтарын алға баҫтырыу һәм үҫтереү темптарын байтаҡ көсәйтергә тейештәр. Бының өсөн мал азығы базаһын нығытырға, инә малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуын бөтөрөргә, малдарҙың үлеүен кәметергә, йәш малдарҙы аҫырап сығарыуҙы арттырыуға өлгәшергә тейештәр. Алдынғы районларҙың бай тәжрибәһе малды тәрбиәләүҙе һәм аҫырауҙы яҡшыртыу юлы менән һыйырҙарҙың, һарыҡтарҙың һәм сусҡаларҙың ҡыҫыр ҡалыуын бөтөрөү өсөн тулы мөмкинлек булыуы тураһында һөйләй. Ошо шартты үтәү йәш малдарҙың һанын 10—15 процентҡа арттырырға мөмкинлек бирә.

Социалистик малсылыҡты тағы ла юғарыраҡ күтәреү өсөн малдарҙы йәйге һәм ҡышҡы кәртәүлектәрҙә йөрөтөүҙе һәм аштауҙы яҡшы ойоштороға кәрәк, һөт һауып алыуҙы, йөн ҡырҡыуҙы артабан үҫтереүгә һәм малдарҙы һимертеүгә өлгәшергә кәрәк. Бының өсөн колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бөтә кәрәкле шарттар бар. 1948 йылда күп йыллыҡ үләндәрҙең болондары артасаҡ, бер йыллыҡ үләндәр, силос культуралары һәм тамыр азыҡтары сәсеүлектәре артасаҡ. Колхоздарға һәм совхоздарға бик күп күләмдә бесән йыйыу машиналары бирелә, тимәк тәбиғи бесән болонлоктарынан яҡшы сифатлы бесәнде тағы ла күберәк йыйып алырға мөмкинлек тыуасаҡ.

* * *

1947 йылда колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыуға, ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөүгә, колхоздар менән идара итеүҙәге демократик нигеҙҙәрҙе нығытыуға етди уңыштарға өлгәшелде. Ерҙе тәртип урынлаштырыуға, колхоздарға мәңгелеккә беркетелгән бөтә ер участкаларын дөрөҫ файҙаланыуға бик күп эш эшләнде. Колхоз ҡоролошоноң төп көсө һәм ныҡлылыҡ сығанағы булған общественный ерҙәрҙең фондтары төрлө кешеләр һәм учреждениелар тарафынан законһыҙ рәүештә алынған участкаларҙы кире ҡайтарып алыу иҫәбенә артты.

Колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан бөтә саралар менән нығытыу— партия һәм совет ойошмаларының үҙәк хужалыҡ-политик бурысы ул. Колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙы арымай-талмай яҡшыртырға, бригадаларҙы һәм звеноларҙы яҡшыртырға кәрәк. Бригадаларҙа һәм звеноларҙа алынған хеҙмәт һөҙөмтәләренә ярашлы рәүештә колхоздарҙа хеҙмәт көнөнә түләүҙе ойоштороу тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы директиваларын үтәү бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Колхоздарҙа, бригадаларҙа һәм звеноларҙа производствоны планлаштырыуҙы яҡшыртырға кәрәк.

Социалистик ярышты киң йәйелдереү, юғары урожай алдынғылары — Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының ғәмәли тәжрибәһен массовый рәүештә пропагандалау, бөтә колхоздарҙың һәм совхоздарҙың был тәжрибәне үҙләштереүҙәре — һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын алға баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең бөйөк бурыстарын уңышлы рәүештә үтәү залогы булып тора.

С. Демидов,

СССР Госпланы председателенең урынбаҫары.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Миланда Де Гасперизең сығышы

РИМ, 15 апрель. (ТАСС). Италияның премьер-министре Де Гаспери Миланда 13 апрелдәге митингыла һайлау алды телмәре менән сығыш яһаны. Митингыла ҡатнашыусыларҙың күпселеге Ломбардияның төрлө урындарынан «католик хәрәкәт» ойошмаһының махсус йөк ташыусы машиналарында килделәр.

Ошо митингыла тиклем ике көн алда Миландың ошо уҡ майҙанында үҙенә Тольятти тарафынан бирелгән һорауҙарҙы ентекле рәүештә еҫләтеп үтеп, Де Гаспери бөтә телмәрен коммунизмға ҡаршы белдереүҙәргә нигеҙләп ҡорҙо. Беренсе бөтә донъя һуғышы осоронда Франц-Иосиф императорына хеҙмәт иткәндә австро-венгрия парламенте депутаты сифатында алып барған деятелнесе айҡанлы демократик матбуғатта уға ҡарата күрһәтелгән тәйепләүҙәрҙән ябынырға маташҡан саҡта, тыңлаусылар араһында һыҙғырыуҙар ишетелде. Был һыҙғырыу «католик хәрәкәтенең» активистарының алҡыштарын күмеп ҡалдырҙы. Үҙенең телмәрен өҙөргә мәжбүр булған Де Гаспери протест күрһәтеүҙәрҙе үҙенең Италияла «азатлыкка» юл ҡуйғанлығы тураһында һөйләй, тип белдерҙе. Лакин митингы тамамлангас та, полиция отрядтары халыҡ массаһына һөжүм иттеләр. Үҙҙәренең юлдарында булған бөтә кешеләрҙе таяҡтылар һәм тараттылар, шпиктарҙың күрһәтеүе буйынса Де Гаспериға һыҙғырыуға батырсылыҡ итеүселәрҙе тота башланылар.

Германияла яңы ялған

БЕРЛИН, 15 апрель. (ТАСС). Насарҙыры менән дан алған «м протоколы» тупаҫ ялған буҙыуы яғынан тамам фаш ителгәндән һуң Берлиндең «Дер курир» газетаһы (Берлиндең Франция секторында сыға), имеш Көнбайыш Германияла «Маршалл планына» ҡаршы йүнәлтелгән «коммунистарҙың яңы саботаж планы» фаш ителде, тигән хәбәр баҫып сығарҙы.

Американың «Нью-Йорк геральд трибюн» газетаһы, яңы «заговор» тураһында беренсе ташҡыр хәбәр итеп, «Германияның Рур өлкәһендәге коммунистар партияһы генеральный секретаре» Альфред Цейдлер (Тернс) подполье хәрәкәтен ойоштороусы булып тора, тип раҫлай.

«Берлинер цейтунг» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда Рур өлкәһенең КПГ ойошмаһының икенсе председателе Альфред Цейдлер Дюссельдорфта матбуғат вәкилдәренә, ошондай ялған «пландарҙы» уйлап сығарыу коммунистарҙың Германия берҙәмлеге өсөн ныҡлы рәүештә көрәш алып барыуҙары өсөн уларҙы масса алдында кәмһетергә маташыу булып тора, тип белдергән. Германияның коммунистар партияһы, тигән шунан әры Цейдлер, «Маршалл планына» ҡарата үҙенең ҡараштарын бер ваҡытта ла йәшермәне. «Маршалл планын» тормошҡа ашырыу Германияны тарҡатыуҙы һәм уның Көнбайыш өлешен колониялаштырыуҙы аңлата. Ошо сәбәптәр буйынса КПГ немец халҡына «Маршалл планының» асылын аңлатты һәм киләсәктә лә аңлатасаҡ.

„Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн!" газетаһының нәүбәттәге номеры баҫылып сыҡты

БЕЛГРАД, 15 апрель. (ТАСС). Бөгөн «Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн!» газетаһының нәүбәттәге (8-се) номеры баҫылып сыҡты. Номерҙа «Коммунистар партияһының идея ҡоралы» тигән баш мәҡәлә, «Империализмға ҡаршы, демократия көстәренең туплаңыуы өсөн» тигән дөйөм баш аҫтында бөтә донъя илдәрендәге демократик көстәрҙең көрәше һәм уңыштары тураһындағы хәбәрҙәр, киләсәктә ППС-тың һәм ППР-ҙың берләшеүе тураһында информацион белдереү, Ракоши Матиастың «Венгрия коммунистар партияһының идеологик эшендәге иң мөһим бурыстар тураһында» тигән мәҡәләһе, матбуғат күҙәтеүе, А. Педведтең «Чехословакия компартияһының аграр политикаһы» тигән мәҡәләһе, Р. Замбровскийҙың «Польша ауылы үҫешенең ҡайһы бер мәсьәләләре тураһында» тигән мәҡәләһе, партия хроникаһы баҫылып сыҡты.

Номерҙа шулай уҡ Этьен Фажондың «Америка партияһы Францияла республиканың законлылығын ҡыҫа» тигән мәҡәләһе, Пьетро Россиҙең «Американың Италиялағы һайлауҙарға тығылыуы», В. Григорьяндың «Реакцион матбуғат — капиталистик монополияларҙың ҡорал йөрөтөүсеһе», тигән мәҡәләһе, С. Мукуниҫтең «Милли бойондороҡһоҙлоҡ өсөн көрәштә Палестина халыҡтары», тәнҡит һәм библиография, «Халыҡ-ара темаларға», «Тарихте боҙоп күрһәтеүселәрҙе фаш итеүсе документтар» тигән редакцион мәҡәлә, И. Кишиневскийҙың, «Румынияла халыҡ демократияһының хәл итеүсе сиреүе» тигән материалдар баҫылып сыҡты.

Италияла һайлауҙар

РИМ, 18 апрель. (ТАСС). Халыҡ демократия фронтының күп кенә етәкселәре илдең төрлө округтары буйынса депутаттар палатаһына кандидаттар булып торалар. Тольятти кандидатураһы Римдә, Туриндә һәм Катанияла тауышҡа ҡуйыла. Ненни кандидатураһы Римдә, Миланда, Палермола күрһәтелде. Луиджи Лонго кандидатураһы Миланда халыҡ фронты исемлегенә индерелде, Бассо кандидатураһы — Миланда, һәм Пизело, ди Витторио кандидатураһы — Бариҙа тауышҡа ҡуйыла.

Атаҡлы яҙыусы Массимо Бонтемпелли Римдә халыҡ фронты кандидаты булып тора. Профессор Флориано Дель Секоло, Көньяҡ Италияның билдәле общественный һәм культура деятеле — Неаполдә халыҡ фронты кандидаты.

Компартияның һәм социалистик партияның күренекле деятелдәренең байтаҡ һаны һайлауҙарҙа ҡатнашмайҙар, сөнки фашизм ваҡытында эҙәрләүҙәргә дусар ителеүҙәре йәки үҙҙәренең элек парламентта эшләүҙәре айҡанлы конституция нормалары нигеҙендә «хоҡуҡ буйынса» сенат члендәре итеп билдәләнделәр. Был төркөмгә айырым алғанда, Террачини, Секкья, Моранди, Партни, Скоччимарро һәм башҡа күп кенә кешеләр инә.

Де Гаспери үҙенең кандидатураһын Римдең, Неаполдең һәм Трентоның һайлау округтарына ҡуйҙы. Сарагат Римдә, Туриндә һәм Миланда «социалистик берҙәмлек» тип атала торған ойошма исемлегендә тора. Пачиарди Римдә һәм Болоньелә республикан партия исемлегендә.

* * *

РИМ, 18 апрель. (ТАСС). 20 сәғәткә бирелгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, һайлауҙар бөтә ил буйынса нормаль хәлдә дауам итә. Тауыш биреү бөгөн 22 сәғәттә (Италия ваҡыты буйынса) туҡтатыласаҡ, иртәгә сәғәт 7-лә яңынан башланып, 14 сәғәттә тамамланасаҡ.

Промышленностең эре үҙәктәре булған — Генуя, Болонья һәм Туринда һайлаусыларҙың 75 процентенең тауыш биреүе тураһында мәғлүмәттәр алына. Римдә ҡаланың тирә-яғындағы поселкаларында һайлаусыларҙың интенсив ағышы күҙәтелә.

Иранда демократияға ҡаршы саралар

ТЕГЕРАН, 18 апрель. (ТАСС). «Иранс Ма» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Иран власттәре Транс-Иран тимер юлындағы профессиональ союздарҙы һәм обществоларҙы таратыу өсөн саралар ҡуралар. Был шуның менән килеп тыуған: ошо күрһәтелгән тимер юл буйынса «АҠШ-тан һатып алынған ҡоралдарҙы һәм һуғыш припастарын ташырға кәрәк булған». Газета, был юлда һуғыш хәле иғлан ителеүе ихтимал, тип өҫтәй.

Англия менән Египет араһындағы мөнәсәбәттәргә ҡарата

КАИР 17 апрель. (ТАСС). «Ан-Нида» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, «АҠШ посолы Англия—Египет мөнәсәбәттәрен ҡатмарлаштырыусы проблемаларҙы мөмкин тиклем тиҙерәк хәл итергә һәм коммунизмға ҡаршы көрәште дауам иттерергә һәм көсәйтергә кәрәк икәнлегенә сит ил эштәре министре Хашаба-пашаның иғтибарын йүнәлткән.

Хашаба-пашаға Американың посолы, халыҡ-ара хәлдең ҡатмарлашыуы айҡанлы төрлө үҙҙәренең көстәрен коммунизмға ҡаршы тулыһынса арнау өсөн Палестина мәсьәләһен тиҙ рәүештә һәм тамам хәл итеү юлын табырға тейештәр», тип белдергән.

КУЛЬТУРА ХРОНИКАҺЫ

1. Грамотаһыҙлыкты бөтөрөү түңәрәге

Ишембай ҡалаһының «Кәҫәпкол» промартеле янында өлкәндәрҙең аҙ грамотаһыҙлығын бөтөрөү буйынса түңәрәк ойошторолдо. Унда 25 кеше уҡый. Улар өсөн бөтә уҡыу шарттары тыуҙырылды. Түңәрәккә йөрөүселәр уҡыу әсбаптары менән тәьмин ителделәр.

Ю. Дауытов,

Ишембайҙың 15-се мәктәп мөдире.

2. Колхоз клубында

Салауат районында Хамматов исемендәге колхоздың клубы иң ҙур һәм яҡшы клубтарҙан иҫәпләнә. Уның етәксеһе булып Ватан һуғышы инвалиде иптәш Фәрит Бәймөхәмәтов эшләй.

Клубта һуңғы яңылыҡтар тураһында систематик рәүештә докладтар үткәрелә, яңы биш йыллыҡ планды, агротехниканы өйрәнеү буйынса түңәрәктәр эшләй. Агротехника түңәрәгенә 33 кеше ҡатнаша.

Бында шулай уҡ юғары урожай алған ауыл хужалығы алдынғылары менән осрашыуҙар үткәрелә, улар үҙҙәренең эш методтары тураһында колхозсылар менән беседалар уҙғаралар.

Клуб янында библиотека ла бар. Библиотеканың иң актив уҡыусылары — йәштәр.

С. Садикова.

3. Ҙур хеҙмәт

Шишмә районы Келәш ауылы ете йыллыҡ мәктәп уҡытыусыһы Нәбиулла Усмановтың уҡытыу эшенә 35 йыл тулды.

Был ябай кешенең бөтә аңлы ғүмере һәм ҙур хеҙмәте мәктәптә йәш быуынды тәрбиәләүгә арналды.

Нәбиулла ағай Усманов уҡытҡан кешеләрҙән республикабыҙҙың хужалыҡ, искусство һәм әҙәбиәт тармаҡтарының күренекле вәкилдәре үҫтеләр. Уны, уҡытыусыларҙың уҡытыусыһы, тип атарға мөмкин. Келәш ауыл мәктәбендә генә 5 уҡытыусы унан уҡыған кешеләр.

Ҡарт уҡытыусы мәктәптән тыш эштәргә бик күп иғтибар итә. Атаәсәләр уға ҙур ихтирам менән ҡарайҙар.

Хәҙерге көндә Нәбиулла ағай Усманов мәктәп менән етәкселек итә. Мәктәп балаларының дәрестән өлгәшеүҙәре 95—98 процентҡа етте, һәм районда был иң юғары күрһәткес булып тора.

Р. Сафин.

Яңы брошюра

Республикабыҙҙың государство издательствоһы «Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән тарихи белешмә материалды брошюра итеп сығарыу өсөн «Октябрь натискаһы» типографияһына тапшырҙы. Был йыйынтыҡ башҡорт телендә массовый тиражда баҫыласаҡ.

Һүрәттә: Педагогия институтының физика-математика бүлеге студенты, гимнастика буйынса Башкортостандың чемпионы Е. Н. Баранов.

В. Жданов фотоһы.

СПОРТ

Матур уңыштар

Совет спорты — ул, бөтөнөһөнән дә элек, массовый булыуы менән совет башҡорт араһында тәрбиә эшенең бер төрө булып әүерелгән. Ул шәһәрҙәр, колхозсылар, уҡыусылар, студенттар һәм хеҙмәткәрҙәр [illegible] Физкультура һәм спорт совет йәштәрен [illegible] Иптәш Молотов Бөтә Союз физкультурниктар парадында ҡатнашыусыларҙы Кремлдә ҡабул иткәндә һөйләгән телмәрендә: «Беҙҙең Советтар Союзында спортсмендар күберәк булһындар ине, беҙҙең [illegible]» — тине.

Башҡортостандағы спорт ойошмалары иптәш Молотовтың был [illegible]

Талантлы совет йәштәре спорт мастерҙарының [illegible] Фин, Армения, Латвия, Литва [illegible]

[illegible] 1067-гә, [illegible] 150 меңгә [illegible]

Шул уҡ ваҡытта, спорт эшенең халыҡ араһында [illegible] 213 кеше инструктор [illegible] Үткән йылда барлығы 15 кеше бөтә төр спорт нормаларын үтәй алған булһалар, ағымдағы йылда 180 кеше үтәне.

Ҡышҡы саф һауала, күҙгә күсек [illegible]

[illegible] йәштәрҙән меңәрләгән спортсмендар тәрбиәләргә, спортты тағы ла массовыйраҡ итергә кәрәк.

Рахман Нәк.

Балалар көсө менән

Ҡыңғыр-Мәнәүез балалар йортонoң (Миәкә районы) бер төркөм пионерҙәре Мәнәүез-Тамаҡ ауылындағы гидроэлектр станцияға экскурсияға барып, уның төҙөлөшө һәм эше менән яҡшылап таныштылар. Экскурсиянан ҡайтҡас, улар шундай уҡ типтағы бәләкәй гидроэлектр станция төҙөргә тәҡдим итеп, балалар йортоноң дирекцияһына һәм пионер ойошмаһына мөрәжәғәт иттеләр.

Пионерҙәрҙең инициативаһы хуплап ҡаршы алынды. Хәҙер балалар йорто территорияһында ирригацион эштәр башланды. Хеҙмәт инспекторы Миңнебай Идиятуллин етәкселегендә электр станцияға кәрәкле ағас, оборудованиены әҙерләнә. Был электростанция өсөн Башавтотракторосбыт динамо машинаһы бирҙе. Балаларҙың гидроэлектр станцияһы тиҙҙән эксплоатацияға биреләсәк.

Коллектив индивидуаль баҡса ултыртыуға әҙерләнде

Завком председателе иптәш А. Егоров булған заводтың коллективе уҙған йылда индивидуаль баҡсасылар араһында агротехник пропаганда алып барыу һөҙөмтәһендә юғары урожай алыуға өлгәшкәйне. Ағымдағы йылда заводтың профсоюз комитете баҡсасыларҙың һанын арттырыу, урожайҙы күтәреү тәңгәлендә эш алып барыуҙы тағы ла көсәйтте.

Ағымдағы йылда индивидуаль баҡсасыларҙың һаны 185 кешегә етәсәк. Уларға тейешле ер участкалары билдәләнгән. Ерҙе ашлау өсөн 3 тонна минераль ашлама килтерелгән. Ватан һуғышында һәләк булыусыларҙың семьяларына ярҙам ойоштороло. Уларға 10 центнер картуф һәм йәшелсә орлоҡтары таратыласаҡ.

Ошо көндәрҙә коллективтең индивидуаль баҡсасылары менән иптәш А. А. Петров «Баҡсанан юғары урожай алырға мөмкин» тигән темаға беседа үткәрҙе. Шулай уҡ «Минераль ашламалар һәм көл менән ерҙе иҫәк ашларға» тигән темаға агроном беседаһы буласаҡ.

Заводтың профсоюз комитете индивидуаль баҡсасыларҙың һорауҙары буйынса эшселәргә таратыр өсөн етерлек һанда кәрәкле ауыл хужалығы ҡоралдары һәм кәрәк, тырма кеүек ваҡ инвентарҙар әҙерләне.

Ватан һуғышы инвалидтарына, шулай уҡ һуғышта һәләк булған воиндәрҙең семьяларына завод ерҙе һөрҙөрөп бирәсәк.

Яуаплы редактор урынбаҫары
З. Ю. ВАХИТОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡорт государство опера һәм балет театрында — «ТОРНАЛАР ЙЫРЫ». Киске сәғәт 8-ҙә башлана.

Рус драма театрында—Премьера «ЦИТАДЕЛДӘГЕ ТОРМОШ». Киске 8 сәғәттә 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта» — «ЧАПАЕВ».

Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».

Күп йыллыҡ үләндәр сәсеүҙе яҡшы үткәрергә

Орлоҡ, йәки бесән өсөн сәселә торған күп йыллыҡ үләндәрҙең урожайы, башҡа ауыл хужалығы культуралары кеүек үк, орлоҡтоң сифатына һәм сәсеүҙең агротехникаһына бәйләнгән. Ҡайһы бер колхоздар үлән сәсеүгә тейешле иғтибар бирмәү һәм агротехниканы тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйыу һөҙөмтәһендә үләндән түбән урожай алалар.

Республикабыҙҙа баҫыу эштәре башланыуға ҡарамаҫтан, Архангель, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ кеүек күп кенә райондар ошо көнгә тиклем үлән орлоҡтарын таҙартыуҙы тамамламағандар. Ә Аҫҡын, Иглин, Оло-Тиләк, Покровка райондарында хатта уҙған йылғы үлән орлоҡтарын һуғыу һәм йыйыу эштәрен дә бөтмәгәндәр.

Үлән орлоҡтарының сифаты тураһында хәстәрлек күрмәү һәм таҙалығы яғынан кондицияһыҙ орлоҡ сәсеүгә юл ҡуйыу тупраҡты ҡый үләндәре менән сүпләүгә, үлән орлоҡтарының ғына түгел, шулай уҡ унан һуң сәселәсәк бөртөклө ашлыҡ культураларының да урожайын түбәнәйтеүгә килтерә.

Уҙған йыл ҡайһы бер колхоздар үҙҙәрендә булған орлоҡтарҙы сәсеп бөтөрмәнеләр. Ағымдағы йылда бөтә күп йыллыҡ үлән орлоҡтары, шул иҫәптән уҙған йыл ҡалғандары ла ныҡлы иҫәпкә алынырға, һуғылып бөтмәгән урындарҙа был эште тиҙерәк ойошторорға, бөтә орлоҡтарҙы тейешле кондицияға килтерергә һәм быйыл уларҙы тулыһынса сәсергә кәрәк.

Үҙләштерелә торған үлән баҫыулы сәсеү әйләнешендә, билдәләнгән баҫыуҙа ҡуҙаҡлы һәм башаҡлы үләндәрҙең ҡушымтаһы сәселергә тейеш. Шул уҡ баҫыуҙың иң яҡшы урынында һәр йыл һайын түбәндәге күләмдәрҙә үләндең орлоҡ участкалары сәселә: клевер—14 процент, тимофеевка—6, люцерна—10-12, житняк һәм американ аҡ тамыры—6 һәм костер 10 процент.

Күп йыллыҡ үләндәрҙе сәскәндә сәсеү нормаһын дөрөҫ ҡулланыу ҙур роль уйнай. Сәсеү нормаһын түбәнәйтеүгә юл ҡуйылырға тейеш түгел. Баҫыу сәсеү әйләнештәрендә ашлыҡ культуралары менән бергә сәсеү өсөн үлән ҡушымталарының түбәндәге нормалары тәҡдим ителә: клевер зонаһында—һәр бер гектарға 10 килограмм клевер, 6 килограмм тимофеевка; клевер-люцерна зонаһында—7 килограмм люцерна, 6 килограмм тимофеевка; люцерналы урман-ялан зонаһында—7 килограмм люцерна һәм 9—10 килограмм американ аҡ тамыры, люцерналы ялан зонаһында — 6—7 килограмм люцерна, 8—9 килограмм житняк.

Был норма мал аҙығы сәсеү әйләнеше өсөн дә тәҡдим ителә, ләкин бында башаҡлы үләндәрҙең өлөшө 40 процентҡа арттырылырға тейеш.

Бөтә күп йыллыҡ үләндәр ҙә тәүге йылда бик аҡрын үҫәләр, ҡый үләндәренә тиҙ бирешеүсән булалар. Шуға күрә лә күп йыллыҡ үләндәрҙе таҙа парға, йәки ҡара парға, шулай уҡ яҡшы итеп туңға һөрөлгән, ҡый үләндәренән таҙа булған ерҙәргә сәсергә кәрәк.

Ҡыҙыл клеверҙе орлоҡ өсөн урман ышығындағы участкаларға, еңел һәм дымы аҙыраҡ булған тупраҡҡа, ҡалҡыу ерҙәргә, ә люцерналы беренсе нәүбәттә һуғарыла торған, йәки урмандан алыҫ булмаған уйһыу ерҙәргә сәсеү яҡшы һөҙөмтәләр бирәсәк. Башаҡлы күп йыллыҡ үләндәрҙе орлоҡ өсөн мал аҙығы сәсеү әйләнештәрендә сәскәндә яҡшы була, ул бер нисә йылдар буйына файҙаланыла.

Үләнде яҙ иң иртә сроктарҙа, тупраҡта дым запасы етерлек булған ваҡытта сәсергә кәрәк.

Үләндәрҙе яҙ ашлыҡ культуралары сәселәсәк майҙанға сәсеү агротехникаһы түбәндәгесә: иң тәү сәскес менән ашлыҡ культуралары — бойҙай, арпа, һоло сәселә (сәсеү нормаһы 15—20 процентҡа кәметелә), унан һуң шул көндө үк, йәки икенсе көндө ашлыҡ культуралары рәтенә арҡылы итеп 2—3 сантиметр тәрәнлегендә күп йыллыҡ үләндәр сәселә.

Ашлыҡ культуралары менән күп йыллыҡ үлән орлоҡтарын бер сәскес йәшнигенә һалып та сәсергә мөмкин. Был айырыуса ябай һәм артыҡ күп хеҙмәт тә талап итмәй. Бындай юл менән сәскәндә, сәскес ашлыҡ культуралары сәсеү нормаһын 15—20 процентҡа кәметеү иҫәбенән сығып көйләнә. Сәсеү алдынан һәр бер гектарға талап ителгән ашлыҡ культураһы орлоғо күп йыллыҡ үлән орлоҡтары менән бергә ҡушыла һәм аралаштырыла. Ваҡ үлән орлоҡтарын ҡойоп әрәм итмәҫ өсөн, яровойлаштырылған ашлыҡ культуралары орлоҡтарын, күп йыллыҡ үләндәрҙең ҡоро орлоҡтары менән бергә ҡушып сәсергә тәҡдим ителә. Әгәр ҙә ашлыҡ культуралары орлоҡтарына яровойлаштырыу үткәрелмәгән булһа, ул ваҡытта үлән орлоҡтарын дымландырып сәсергә кәрәк. Сәскестең йәшнигенә яртылаш ҡына орлоҡ һалына һәм сәсеү ваҡытында орлоҡтар бик йыш буталып торалалар. Улар ергә 3—4 сантиметрҙан да тәрән күмелдерелергә тейеш түгел.

Республикабыҙ шарттарында тары менән люцернаны бер сәскестән киң рәтле итеп бергә сәсеү ҙә яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Сәсеү нормаһы һәр бер гектарға 10 килограмм тары һәм 4 килограмм люцерна орлоғо иҫәбенән билдәләнә. Орлоҡтар сәсеү алдынан бергә ҡушылалар.

Орлоҡ өсөн күп йыллыҡ үләндәрҙе ашлыҡ культураларына ҡушмайынса сәсеү файҙалыраҡ. Шуға күрә һәр бер колхоз үләнде ашлыҡ культуралары менән бергә ҡушып сәсеүҙән башҡа, быйыл яҙ күп йыллыҡ үләндәрҙе, бигерәк тә люцерна, житняк, американ аҡ тамыры һәм ҡыҙыл клеверҙе үҙҙәрен генә киң рәтле итеп пар ерена, йәки яҡшы итеп туңға һөрөлгән ергә сәсеүҙе тәьмин итергә тейеш.

А. Первозванский,

БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының өлкән агрономы.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00129. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-лың Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 80 21 апрель шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАССР Верховный Советы Президиумында. (1-се бит).
Май алды ярышы. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Струков. — Партия йыйылыштарында коммунистарҙың актив ҡатнашыуына өлгәшергә. Ғ. Ибраһимов. — Коммунистар заводтың рентабелле эшләүе өсөн көрәшәләр. (2-се бит).
Гәрәй Әмир. — Промартелдә. (2-се бит).
Ф. Кошелев. — Совет кешеләренең героик хеҙмәте — совет патриотизмының юғары кәүҙәләнеше. (2—3-сө биттәр).
И. Н. Винников. — Фәнни батырлыҡ. (3-сө бит).
Ғ. Рамазанов. — «Сулпан» колхозы кешеләре (3-сө бит).
Н. Сахматин. — Донник — бал ҡорттары өсөн яҡшы азыҡ базаһы. (3-сө бит).
БЕҘГӘ ЯҘАЛАР. — Тимер юл вокзалдарында тәртип урынлаштырырға. М. Вәлиева. — Газета витриналары тураһында. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Киң ҡулланыу тауарҙарының ассортиментен киңәйтергә, сифатын яҡшыртырға

Большевиктәр партияһы һәм совет Хөкүмәте хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреш кимәлен яҡшыртыу тураһында эҙмә-эҙ хәстәрлек күрәләр. Илебеҙҙә аҡса реформаһы үткәрелеүе, аҙыҡ-түлеккә карточка системаһы бөтөрөлөп, йәйелдерелгән асыҡ совет сауҙаһына күсеү, тауар хаҡтарының әленән-әле түбәнәйтелә барыуы сталинсе хәстәрлектең гүзәл һөҙөмтәһе булып тора.

Һуғыштан һуңғы яңы биш йыллыҡ план уңышлы рәүештә үтәлә бара. Уның тәүге ике йылы ҙур уңыштар менән тамамланды, а өсөнсө йылының беренсе кварталы илебеҙгә тағы ла ҙурыраҡ өлгәшеүҙәр килтерҙе. Ағымдағы йылдың беренсе кварталында промышленностең бөтә тармаҡтары ла, үткән йылдың беренсе кварталына ҡарағанда, продукция эшләп сығарыуҙы бик ныҡ арттырҙылар. Шул иҫәптән хеҙмәтсәндәр өсөн киң ҡулланыу тауарҙары етештереү ҙә өҙлөкһөҙ үҫә һәм уларҙың ассортименттәре киңәйә бара.

Аҡса реформаһы үткәреү һәм карточкалар системаһын бөтөрөү тураһында партия һәм хөкүмәттең тарихи ҡарары айҡанлы урындағы промышленность һәм промкооперация алдына киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе артабан ныҡ арттырыу, уларҙың ассортиментен киңәйтеү һәм сифатын ҡырҡа яҡшыртыу буйынса айырыуса яуаплы бурыстар ҡуйылды.

Әйтергә кәрәк, республиканың урындағы промышленность һәм промкооперация работниктәре был маҡтаулы бурыстарҙы тормошҡа ашырыуҙа йомшаҡ эшләйҙәр әле. Ағымдағы йылдың тәүге өс айында йөҙҙәрсә мең һумлыҡ киң ҡулланыу тауарҙары бирелеп еткерелмәне. Күп кенә ваҡиғаларҙа пландар ассортименттәр буйынса ла үтәлмәйҙәр. Промкооперация буйынса 29 төр яңы продукцияның сте төрө генә үҙләштерелде. Ҙур ғына предприятиеларҙан иҫәпләнгән Бөрө, Архангель, Туймазы һәм башҡа ҡайһы бер район промкомбинаттары беренсе кварталда производство пландарын 50 процент күләмендә генә үтәнеләр. Промкооперация управлениеһының Ишембайҙағы «Көсәпкол», «19 лет Октября», «Алға» артелдәре, шулай уҡ башҡа ҡайһы бер артелдәр тураһында ла шуны әйтергә мөмкин.

Республикабыҙ һәр төрлө сырьё ресурстарына иҫәпһеҙ-сикһеҙ бай булыуға ҡарамаҫтан, урындағы промышленность, промкооперация работниктәре уларҙы киң файҙаланыуҙа тейешле инициатива күрһәтмәйҙәр әле. Бында урындағы Советтарҙың да үҙҙәренең эске резервтарын хәрәкәткә килтереүҙә тейешенсә хәстәрлек күрмәгәнлектәрен әйтергә кәрәк.

Ашамлыҡ тауарҙарының төрҙәрен киңәйтеү өсөн мөмкинлектәр аҙмы ни? Бал, шәкәр сөгөлдөрөн генә алығыҙ. Шулай ҙа улар беҙҙең промкооперация тарафынан ла, шулай уҡ аҙыҡ тауарҙары етештереүсе башҡа ойошмалар тарафынан да ҡәнәғәтләнерлек рәүештә файҙаланылмай.

Һуғышҡа тиклем Стәрлетамаҡ, Бөрө, Воскресен мебель фабрикаларында йылына меңләрсә дана яҡшы венский ултырғыстар эшләп сығарыла ине. Хәҙер улар Стәрлетамаҡта ла, Бөрөлә лә эшләнмәйҙәр. Ә Воскресенскиҙәге фабрика бик аҡрын аяҡҡа баҫтырыла.

Йәки бына республикала ғына түгел, бөтә Советтәр Союзы ҡуләмендә маҡталған Зианчура, Хәйбулла артелдәре етештерә торған мамыҡ шәлдәрҙе алығыҙ. Улар хәҙер бөтөнләй аҙ етештерелә.

Продукцияның ассортиментен киңәйтеү өсөн көрәштең йомшаҡ алып барылыуы менән бер рәттән, уларҙың сифатын күтәреү, үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү мәсьәләләре лә тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылмаған әле. Техник талаптарға яуап бирмәгән продукциялар сығарыу ваҡиғалары йыш ҡына осрайҙар. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһында Киров райпромкомбинаты (директоры иптәш Гузеев) тарафынан эшләнгән сауҙа ойошмаларына оҙатылған ундарса мең һумлыҡ ботинкалар, тапочкалар бракка сығарылып, кире ҡайтарылалар. Музпрокат артеле (Өфө) тарафынан эшләнгән һәм һатырға сығарылған дүрт планкалы гармондар ошондай уҡ сәбәп менән бракка сығарылды. Сифатһыҙ продукция сығарыу менән улар государствоға ҙур зыян килтерәләр. Брак сығарыусы — ул государствоға зыян килтереүсе, енәйәт эшләүсе итеп ҡаралырға тейеш. Ә ғәйепләләр һәм уға юл ҡуйыусылар закон тәртибендә яуапҡа тартылырға тейештәр.

Комбинаттарҙа һәм артелдәрҙә производство процестарын камиллаштереү бик түбән. Мастерскойҙарҙың, цехтарҙың күпселек өлөшө механизациялаштырылмаған. Был хәл хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡының юғары булыуына килтерә.

Республикала урындағы промышленность һәм промкооперация системаһы ағымдағы йылда 130 миллион һумлыҡ самаһы, йәки үткән йылға ҡарағанда егерме өс миллион һумға артыҡ киң ҡулланыу тауарҙары етештерен сығарырға, мебелдәр, керамик черепицалар, огнеупор кирбес, бығауҙар һәм башҡа күп төр продукциялар етештереүҙе үҙләштерергә тейештәр. Был ҙур һәм яуаплы бурысты үтәү һәр бер коллективтың намыҫ эше ул.

Сифат һәм ассортимент — улар продукция етештереүсе предприятиелар коллективтәре өсөн закон булып торорға һәм һәр бер коллектив үҙ предприятиеһе һәм артеле тарафынан сығарыла торған продукцияның ошо талаптарға яуап биреүе өсөн намыҫлы рәүештә көрәшергә тейеш.

Урындағы промышленность һәм промкооперация работниктәре ленинградлыларҙың саҡырыуына ҡушылып, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү йөкләмәһе алдылар. Был данлы бөтә халыҡ хәрәкәтендә юғары хеҙмәт ырамлылығы биреүсе йөҙҙәрсә стахановсылар үҫеп сыҡты. Урындағы партия һәм совет ойошмаларының бурысы — киң ҡулланыу тауарҙары етештереүсе коллективтәрҙе биш йыллыҡ заданиеларын уңышлы үтәү, халыҡҡа бай ассортиментта юғары сифатлы тауарҙарҙы күберәк сығарыу, хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙе артабан яҡшыртыу өсөн фидакәр хеҙмәткә мобилизовать итеүҙән тора.

Илдең йылғаларында навигация башланды

Көн яҡтағы йылғаларҙа йөк ташыу киң йәйелдерелде. Днепрҙа навигация башланды. Киев — Гомель, Киев—Чернобыль араһында пассажир пароходтары йөрөй. Десна йылғаһының юғары ағымында Украина өсөн төҙөү материалдары, картуф орлоғо тейәгән судналар ҡарауға сыҡты.

Березина, Сож, Припять йылғаларында йөк ташыу башланды. Припять йылғаһы буйлап караулдар йөрөй. Улар Донбасҡа тимлөш һәм шахталарға ныҡытмалар өсөн ағас материалдар алып китәләр.

Аму-Дарья йылғаһында ла навигация башланды.

Волгала беренсе пароходтар сыҡтылар. Астраханнан Владимировкаға яҡынлыҡ тейәп танкер китте. «Чусов» пароходы Астрахандан балыҡ промышленносе өсөн Владимировканан тоҙ тейәп китте.

(ТАСС)

Механизатор кадрҙар

Учалы районындағы өлкә-ара механизаторҙар мәктәбе беренсе набор уҡыусыларына һынау үткәрҙе. Барлығы 90 кеше экзамен бирҙе. Шуларҙан 24 кеше һынауҙы отличноға, 33 кеше яҡшыға [illegible] тапшырҙылар. Һынау үткән уҡыусыларҙың бөтәһенә лә трактор йөрөтөү хоҡуҡы бирелде.

Мәктәптә 30 кеше комбайнерҙар [illegible] уҡый. Уҡыусыларҙан [illegible] планы тағы ла күберәк булаҫаҡ.

Май алды ярышы

Июнь айы иҫәбенә

Цемент-силикат комбинаты (директоры иптәш Е. Я. Либерман) 1948 йылдың беренсе квартал планын 130 процентка үтәне. Үҙгән йылдың беренсе кварталына сағыштырғанда комбинатта силикат кирбестәр ике ярым тапҡыр күберәк эшләп сығарылды.

Өлгәшелгән уңыштың сере шунда: быйыл комбинатта хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү буйынса мөһим саралар тормошҡа ашырылды. Транспорт цехында сделщина индерелде. Завод өсөн эзбиз элек ситтән алына ине. [illegible] һәм заказчиктарҙан алына. Хәҙер был төр продукция заводтың үҙендә етештерелә башланы.

Комбинатта социалистик ярыш менән етәкселек итеү эше яҡшырҙы. Ярышта еңеүсе цехҡа күсмә «Ҡыҙыл Байраҡ» бирелә. Алдынғы сменаларға күсмә флажоктар бирелә.

Коллектив май алды социалистик ярышына ҡушылып, 4 айҙа 5 айлыҡ планды үтәргә йөкләмә алғайны. Йөкләмә срогынан алда үтәлде. Комбинат коллективы инде июнь айы иҫәбенә эшләй башланы.

Р. Ғәбдрахманов.

Пландан тыш 100 мотор

Черниковск машиналар төҙөү заводының начальниге иптәш Елагин булған цех комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре май байрамы хөрмәтенә эш сәғәтенән тыш 50 комбайн моторы йыйырға март айында уҡ йөкләмә алып, стахановсы вахтаға баҫҡайнылар. Улар үҙ-ара ярышып эшләп, алған йөкләмәләрен 1 апрелгә уҡ үтәнеләр. Гүзәл еңеүҙәр менән рухланған комсомолецтәр һәм йәш эшселәр 1 майға тиклем тағы ла 50 комбайн моторы йыйырға булдылар һәм улар алған йөкләмәләрен уңышлы үтәп киләләр.

Социалистик ярышта иптәш Визгин етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы беренсе урынды алып килә. Иптәш Рәис Басиров етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы эш нормаһын даими рәүештә 200—250 процентка, иптәш Михаев бригадаһы 180—200 процентка үтәй.

1 майға—ете айлыҡ план

ОКТЯБРЬСК (Телефон аша). «Нарат» промартеле коллективе (председателе иптәш Әхлиуллин) алдынғы предприятиелар коллективтәренең саҡырыуына яуап итеп 1948 йылдың производство программаһын 8 айҙа тамамлау йөкләмәһе алғайны. Артель члендәре биргән һүҙҙәрен намыҫлы үтәп киләләр. Мәҫәлән, беренсе квартал производство планы байтаҡ арттырып үтәлде. Шул иҫәптән киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыу 135, тауар әйләнеше 145 процент тәшкил итә. Коллектив, икмәк-булка изделиеләре ике тапҡыр самаһы артыҡ эшләп сығарылды.

Артель члендәре май алды социалистик ярыштың инициаторы булған беренсе борауҙау конторәһы коллективының өлгөһөндә, май байрамына ете айлыҡ планды тамамлап бирергә ҡарар иткәйнеләр. Һүҙ эштән айырылмай. Артель продукция эшләп сығарыу буйынса көндәлек заданиены бер ярым-ике тапҡырға үтәй.

С. Ғәлимова.

Башҡала байрамға әҙерләнә

Өфө хеҙмәтсәндәре Беренсе Май байрамын ҙур производство күтәренкелектәре менән ҡаршылайҙар. Ҡала хеҙмәтсәндәре биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү, бөтә предприятиеларҙа рентабелле эшләүгә күсереү, ҡаланы төҙөкләндереү, предприятиеларҙың ярҙамсы хужалыҡтарында яҙғы сәсеүҙе үҙ ваҡытында тамамлау лозунгыһы аҫтында байрам алды ярышына ҡушылдылар.

ВКП(б)-ның ҡала комитеты байрам алды көндәрендә партия ойошмаларының бурыстары тураһында партияның тәүге ойошмалары секретарҙарының кәңәшмәһен үткәрҙе.

Ҡаланың бөтә райондарында, 1948 йылдың I квартал йомғаҡтары һәм байрам ярышында предприятиеларҙың бурыстары тигән мәсьәләләр менән район партия, хужалыҡ активе йыйылыштары үткәрелә.

Парткабинеттарҙа, библиотекаларҙа, ҡыҙыл мөйөштәрҙә күргәҙмәләр, витриналар ойошторолдо.

Хәҙер ҡала предприятиеларында, учреждениеларында, мәктәптәрҙә, уҡыу йорттарында халыҡ-ара байрам тураһында докладтар, беседалар үткәрелә. Бинаһарҙы биҙәү өсөн плакаттар, лозунгылар яҙыла.

Һал ағыҙыу башланды

Ошо көндәрҙә Юрюзань леспромхозы беренсе 2 мең кубометр ағасты Кошелевка йылғаһына төшөрҙө.

Быйыл республикала 19 йылға буйынса бер нисә йөҙ мең кубометр ағас ағыҙыласаҡ.

БАССР Верховный Советы Президиумында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы 1948 йылдың 15 апрелендәге ултырышында Башҡортостандың предприятиеларында һәм учреждениеларында хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларға ҡаршы көрәштең торошо тураһында Башҡорт АССР-ы Юстиция Министры иптәш Авзяновтың докладын тыңланы. Президиум СССР Союзы Верховный Советы Президиумының 1940 йыл 26 июнь Указын тормошҡа ашырыу эшенең Башҡортостанда ҡәнәғәтләнерлек булмауын билдәләне.

Дөйөм алғанда республикала прогулдар һаны бик күп кәмене. Ләкин, айырым предприятиеларҙың етәкселәре 1940 йыл 26 июнь Указын тормошҡа ашырыуға иғтибарҙы йомшарттылар. Шул сәбәпле 1947 йылда төҙөләш тресында, директоры иптәш Кузнецов булған заводта һәм Өфө текстиль комбинатында прогулдар һәм үҙ белдегө менән эштән китеүҙәр һаны артты.

Был предприятиеларҙа прогул яһаусыларҙың, үҙ белдеге менән эштән китеүселәрҙең күпселеге ФЗО мәктәптәрен һәм һөнәрселек училищеларын тамамлап эшкә яңы килгән йәш эшселәр булыуы билдәләнде. Күп кенә предприятиеларҙа йәш эшселәрҙең ихтыяждары, торлаҡ һәм көн-күреш шарттары тураһында тейешле хәстәрлектең булмауы һәм хеҙмәт дисциплинаһы тураһындағы законарҙы аңлатыу буйынса политик-массовый эш етерлек алып барылмауы прогулдарҙы һәм эштән үҙ белдектәре менән китеүҙәрҙе килтереп сығарҙы.

Төҙөләш тресында (управляющие иптәш Наседкин) эшселәрҙең дөйөм торлаҡтары йыйыштырылмай һәм таҙартылмай. Шул сәбәпле массовый рәүештә прогул яһау, рөхсәтһеҙ эштән китеү ваҡиғалары бар. Бигерәк тә йәш эшселәр прогул яһайҙар һәм эштән үҙ белдектәре менән китәләр.

Директоры иптәш Кузнецов булған заводта ла шундай уҡ хәл. Был предприятиеларҙың етәкселәре кадрҙарҙы үҫтереүгә иғтибар менән ҡарау, йәш эшселәрҙең квалификацияларын күтәреү һәм нормаль эш шарттары булдырыу урынына, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙың төп методы итеп хөкөм яҙаһын ҡулланыуҙы ғына иҫәпләп, яңылыш юлға баҫҡандар, прогулдарҙы, үҙ белдеге менән эштән китеүҙәрҙе килтереп сығарыусы сәбәптәрҙе бөтөрөү сараһын күрмәгәндәр.

БАССР Верховный Советы Президиумы, ҡайһы бер предприятие етәкселәренең кешеләрҙең яҙмышына формаль-бюрократик рәүештә ҡарап, ғәйебе булмаған эшселәрҙе һәм хеҙмәткәрҙәрҙе хөкөмгә биреүҙәрен юл ҡуйылмаслыҡ хәл түгел тип иҫәпләй.

1940 йыл 26 июнь Указын еренә еткереүҙә халыҡ судтарының һәм ҡала, район прокурорҙарының да етешһеҙлектәре бар. Был Указ нигеҙендә ғәйепләнеүселәрҙең эше халыҡ судтарында ваҡытында ҡаралмай. Шулай уҡ, был мөһим эшкә еңел ҡарау ваҡиғалары ла бар.

Бындай категориялағы эштәрҙе ҡарағанда халыҡ судьялары һәм прокурорҙар, прогулдарҙың, эштән үҙ белдектәре менән китеүселәрҙең һанын арттырыуға юл ҡуйыусы, шулай уҡ прогулсыларға материал төҙөү һәм хөкөмгә биреү эшендә волокитаға килешеп ҡарап, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларҙы йәшереүсе предприятие етәкселәрен яҙаһыҙ ҡалдыралар.

Район һәм ҡала Советтарының башҡарма комитеттәре хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу мәсьәләһе менән бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр, башҡарма комитет ултырыштарында предприятие һәм учреждение етәкселәренең отчеттарын тыңламайҙар, йәш эшселәргә тейешле эш шарттары тыуҙырмауҙы предприятие һәм учреждение етәкселәренә тейешле сара күрмәйҙәр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы предприятие һәм трестарҙың етәкселәренән бигерәк тә йәш эшселәргә тейешле торлаҡ-көн-күреш шарттары булдырыуҙы, 1940 йыл 26 июнь Указын еренә еткереп үтәүҙе, был тәңгәлдәге ҙур етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙе һәм предприятиеларҙан үҙ белдеге менән китеү һәм прогул яһауҙарҙы булдырмау сараһын күреүҙе талап итте.

Верховный Совет Президиумы Башҡорт АССР-ы Юстиция министры иптәш Авзяновты 1940 йыл 26 июнь Указы менән ғәйепләнеүселәрҙең материалдарын ҡарау буйынса халыҡ судтарының эштәрен яҡшыртыу сараларын күрергә, бындай категориялағы эштәрҙе ҡарауға волокита һәм әҫтән-әҫтән генә ҡараштарын бөтөрергә, бигерәк тә промышленность ҡалалары — Өфө, Черниковск, Белорет, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Октябрьскиҙәге халыҡ судтарының эшенә ҡаты контроль булдырырға мәжбүр итте.

Бер үк ваҡытта, Верховный Совет Президиумы, Башҡорт АССР-ы прокуроры иптәш Набатовҡа предприятие һәм учреждение етәкселәре тарафынан 1940 йыл 26 июнь Указының һәм СССР Союзы Халыҡ Комиссарҙары Советының 1940 йыл 21 август ҡарарының үтәлеүенә район һәм ҡала прокурорҙарының күҙәтеүен көсәйтеүҙе, ҡала һәм район прокурорҙарынан прогулсыларҙың материалдарын хөкөмгә биреү эшендәге волокитаны ҡаты рәүештә бөтөрөүҙе, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларҙы йәшереүсе, шулай уҡ эшселәрҙең ихтыяждарына йәнһеҙ ҡарауҙы, уларға нормаль торлаҡ-көн-күреш шарттары булдырмауҙы һәм эшселәрҙе законһыҙ хөкөмгә биреүсе предприятие һәм учреждение етәкселәрен яуапҡа тарттырыуҙы талап итеү бурысын йөкмәтте.

Верховный Совет Президиумы район һәм ҡала Советы башҡарма комитеттарының председателдәренә Указды тормошҡа ашырыу эшенең торошо тураһында промышленность предприятиелары етәкселәренең, халыҡ судьялары һәм прокурорҙарҙың отчеттарын тыңларға, предприятиеларҙа хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу буйынса ҡырҡа саралар күрергә тәҡдим итте.

ХЕҘМӘТ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҒЫ ОРДЕНДӘРЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ АЛДЫНҒЫЛАРЫ.

Ф. С. Утарбаев — Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың члены. Ул эшләгән звено 1947 йылда 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алды.

М. М. Мәғафуров — Баймаҡ районы Карл Маркс исемендәге колхоздың члены. Ул эшләгән звено 11 гектар майҙандың һәр гектарынан 30,7-шәр центнер арыш урожайы алды.

Н. В. Лапонов — Дәүләкән районы Ворошилов исемендәге колхоздың председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 24-әр центнер бойҙай урожайы алды.

В. М. Головин — Бәкәлы районы «Красная пахарь» колхозы члены. Ул эшләгән колхоз 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,4-әр центнер арыш урожайы алды.

В. А. Садовников — Дәүләкән районы «Красная поляна» колхозының председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 61,5 гектар майҙандың һәр гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алды.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия йыйылыштарында коммунистәрҙең актив ҡатнашыуҙарына өлгәшергә

Партия йыйылыштары коммунистәрҙе большевистик тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнай. Хәҙер, партия үҙенең члендарын һәм кандидаттарын тәрбиәләү эшенә айырыуса ҙур иғтибар биргән бер ваҡытта, партия йыйылыштарының әһәмиәте тағы ла ҙурая.

Беҙҙең заводтың партия ойошмаһы йәш әле. Уның составындағы ВКП(б) члендарының һәм кандидаттарының 76 проценте Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа партия сафына ингән иптәштәр. Шуға күрә ВКП(б) Үҙәк Комитетенең партия-политик эште көсәйтеү тураһындағы күрһәтмәләре беҙҙең партия ойошмабыҙ өсөн айырыуса әһәмиәтле. Беҙ коммунистәрҙе тәрбиәләүҙә көслө средстволарҙың береһе булған партия йыйылыштарына әҙерләнеү һәм уны үткәреү эшен байтаҡ яҡшырттыҡ. Ләкин был беҙҙең эшебеҙҙә етешһеҙлектәр юҡ һәм үткәрелә торған йыйылыштар бөтәһе лә хәҙерге талаптарға яуап бирәләр тигән һүҙ түгел әле.

Беҙҙә элегерәк йыйылыштар һирәк үткәрелә ине. Һуңынан беҙ был етешһеҙлекте бөтөрҙөк. Хәҙер партия йыйылыштары регуляр рәүештә үткәрелә башланы.

Беҙҙең партия йыйылыштарының көн тәртиптәре туранан-тура партия ойошмаһының үҙенең тормошонан һәм завод коллективы алдында торған бурыстарҙан килеп сыға. Беҙ йыйылыштарҙа социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлеше, комсомол ойошмаһына партия етәкселеген көсәйтеү, партия документтәрен һаҡлауҙың торошо, ВКП(б) члендәренең һәм кандидаттарының марксистик-ленинсе теорияға эйә булыуҙарын яҡшыртыу саралары һәм башҡа шундай мәсьәләләрҙе тикшерҙек.

Партия йыйылыштарында ошондай мөһим мәсьәләләрҙе тикшереп беҙ коммунистәрҙе идея яғынан ҡоралландырыуға, уларҙың эштәрен партия тарафынан ҡуйылған бурыстар кимәленә күтәреүгә, коммунистәр аша заводтың бөтә коллективына йоғонтоно көсәйтеүгә, шулай итеп, хеҙмәт етештереүсәнлеген айҙан-айға юғары күтәреүгә, производство программаһын систематик рәүештә арттырып үтәүгә, үҙ заводыбыҙҙың рентабелле эшләүенә өлгәштек. Беҙҙең завод үткән — 1947 йыл планын 131,6 процентка еткереп үтәне.

Эш планы төҙөгәндә мин, иң элек быға саҡлы булып үткән йыйылыштарҙа, бюро ултырыштарында йәки айырым коммунистәр менән һөйләшкән ваҡытта улар индергән тәҡдимдәрҙән сығып эш итәм. Алдан бер нисә мәсьәлә билдәләйем һәм аҙаҡтан был мәсьәләләрҙең ҡайһыһын беренсе нәүбәткә ҡуйырға актив менән кәңәшләшәм һәм шуларға ҡарап план төҙөйөм һәм уны партбюро раҫлауына ҡуям.

Йыйылыш булырҙан бер нисә көн алда беҙ ниндәй көн тәртибе тикшереләсәген коммунистәргә хәбәр итәбеҙ, алдан тейешле әҙерлек саралары күрәбеҙ.

Бына мәҫәлән, коммунистәрҙең марксизм-ленинизм теорияһын өйрәнеүҙәренең торошо тураһындағы мәсьәләгә арналған йыйылыш айырыуса ҙур активлек менән үтте. Йыйылышта ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыу нигеҙендә беҙ дәйем белем алыу түңәрәге ойошторҙоҡ. «Химиктар» клубы эргәһендә ял көнө лекторийһе астыҡ. Политик мәктәптә уҡыусылар программаны тулыһы менән үттеләр. ВКП(б) тарихен өйрәнеү түңәрәгенә йөрөүселәр хәҙер ҡыҫҡаса курстың 9-сы бүлеген өйрәнәләр.

Ҡайһы берҙә теге йәки был мәсьәләне өйрәнеү һәм йыйылышта уның актив тикшерелеүен тәьмин итеү һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул итеү өсөн әҙерлеккә бер нисә көн ваҡыт та етә. Ләкин йыйылыш үткәрергә әҙерләнгәндә көн тәртибенә ҡуйыласаҡ мәсьәләләрҙе алдан өйрәнеүҙә лә һәм шулай уҡ сығарылған ҡарарҙы практик тормошҡа ашырыуҙа ла коммунистәрҙең актив ҡатнашыуҙарына өлгәшергә кәрәк.

Беҙҙең был тәңгәлдәге етешһеҙлектәребеҙҙең береһе шунда: бынан элек булып үткән йыйылышта ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы нисек үтәүебеҙ тураһында йыйылыш алдында отчет бирмәйбеҙ һәм ҡарар проекттарын төҙөүгә коммунистәрҙе етерлек кимәлдә йәлеп итмәйбеҙ. Унан һуң, беҙ йыйылыштарҙа коммунистәрҙең бөтәһенең дә актив ҡатнашыуҙарына өлгәшеп етмәгәнбеҙ әле. Коммунистәрҙән бер нисә кеше йыйылышта сығыш яһап ғәҙәтләнмәгән. Йыйылыштарҙа доклад яһаусылар һаны ла бик аҙ әле.

Беҙ хәҙер был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү сараларын күрәбеҙ. Мәҫәлән, күптән түгел партия йыйылышында коммунистәрҙең активлегенә һәм уларҙың фекер алышыуҙа ҡатнашыуҙарына ентекле анализ яһаныҡ һәм ҡайһы бер коммунистәрҙең сығыш яһамауҙарының сәбәптәрен астыҡ. Мин үҙем улар менән беседа үткәреп, уларҙы йыйылышта нисек сығыш яһарға өйрәттем. Һөҙөмтәлә быға саҡлы пассив кеүек йөрөүсе ете коммунистан бишеһе йыйылыштарҙа фекер алышыуҙа ҡатнаша башланы. Коммунистәрҙең йыйылыштарҙа актив ҡатнашыуҙары уларҙың партия ойошмаһының көндәлек эшен йәнләндереүгә, ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың аныҡ үтәлеүенә булышлыҡ итте.

М. Струков,

Черниковск химия заводының партия ойошмаһы секретаре.

Коммунистәр заводтың рентабелле эшләүен тәьмин итеү өсөн көрәшәләр

Стәрлетамаҡ ҡалаһының машиналар төҙөү заводы бынан бер йыл элек күпкә артта ҡалыусылар иҫәбендә ине. Был өҙөклөктән сығыу өсөн партия ойошмаһы бөтә коллективте көрәшкә күтәрҙе һәм заводтың ритмле эшләүенә өлгәште.

Эштең уңышы социалистик ярыштың дөрөҫ ойошторолоуына ныҡ бәйләнгән. Шуға күрә лә бында заводтың һәр бер эшсеһе һәм инженер-техник работниге социалистик ярыш менән солғап алынған. Коммунистәр, киң йәйелдерелгән агитацион-массовый эш менән, ярышыусыларҙа алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн яуаплылыҡ тойғоһо уяттылар. Агитаторҙар цехтарҙа, бригадаларҙа заводтың һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планы һәм уны дүрт йылда үтәү өсөн ҡулланыласаҡ ойоштороу-техник саралар тураһында беседалар үткәрҙеләр. Планды үтәү өсөн һәр бер эшсегә йөкмәтелгән бурысты аңлаттылар.

Алдынғы эшселәрҙең стахановсы эш методтарын пропагандалауға ла бик ныҡ иғтибар ителде. Алдынғыларҙың өлгәлө эштәре тураһында стена газетаһына, күрһәтмә таҡтаһына яҙылды.

Коммунист агитаторҙар үҙҙәре лә производство алдынғылары булып торалар. Агитаторҙарҙан Хисмәтов, Абдуллин, Журавлев, Бадретдинов һәм Аблиев иптәштәр 1947 йылда 2—2,5 йыллыҡ нормаларын үтәүгә өлгәштеләр. Хәҙер ҙә улар көндәлек нормаларын систематик рәүештә 250—300 процентка еткереп үтәйҙәр.

Дөрөҫ ойошторолған агитацион-массовый эш бөтә коллективте активләштерҙе. Элек артта барыусы цехтарҙа ла хеҙмәт етештереүсәнлеге бик ныҡ күтәрелде. Тимерлек, инструменттар, ремонт һәм модель цехтары өҙөклөктән сығып, алдынғылар сафына баҫтылар.

Завод коммунистәре цехтарға рационализаторлыҡ тәҡлимдәре индереү юлы менән дә күп көмә ярҙам иттеләр. Коммунистарҙан Лучкин, Башкиров, комсомолецтарҙан Смагин, Кузнецов һәм Шалагина иптәштәр производствоға яңы эш методтарын йылдам рәүештә индерәләр.

Партия ойошмаһының заводтағы производство процестарен тәрән рәүештә белеп етәкселек итеүе һөҙөмтәһендә 1947 йылдың планы срогынан алда үтәлеп, илебеҙгә пландан тыш 200 мең һумлыҡ продукция бирелде. Заводтың производство ҡеүәте 1946 йылға ҡарағанда 71 процентка үҫте. 1948 йылдың I квартал планы 133 процентка еткереп үтәлде. Быйыл заводта продукцияның күләмен, үткән йылға ҡарағанда, 95 процентҡа арттырыу күҙҙә тотола. Был бурысты үтәү өсөн бөтә эске мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып, ойоштороу-техник саралар планы төҙөлдө. Коммунистәр бирелгән вәғәҙәне намыҫ менән үтәү өсөн көрәште бөтә көслөгө менән йәйелдерҙеләр.

Ғ. Ибраһимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

«Калининуголь» трестының Калинин исемендәге шахтаһы (Донбасс) забойщигы коммунист Александр Тюренков сменала 669 тонна күмер биреп, норманы 4746 процентка үтәне. Ул Донбасста быға тиклем ҡуйылған юғары рекорд бирҙе.

Һүрәттә: Забойщик А. Тюренков.

Г. Гендельман фотоһы (ТАСС фотохроникаһы)

Минск трактор заводы төҙөлөшөндә

МИНСК, (ТАСС). Белоруссия башҡалаһының көньяҡ ситендә, яңы һалынған шоссе юлы буйлап, Минск трактор заводының маһабәт күренеше төҙөлөп панорамаһы йәйелгән. Оҙон көн буйына бында эш тукталмай. Ҙур корпустар төҙөлә, яңы цехтар, көслө станоктар, машиналар беренсе тапҡыр эш башлайҙар. Ошо көндәрҙә мотор цехы төҙөү тамамланды. Был цехта иң яңы конструкцияның станоктар монтажлаштырылған.

Көслө темп менән ҡойоу, тимерлек һәм штамп цехтары төҙөлә. Механик-ремонтлау, суйын ҡойоу цехтарында металды эшкәртеү станоктары, сифатлы деталдәр ҡойоу өсөн көслө вагранкалар урынлаштырылған.

Предприятиенең территорияһында көслө ТЭЦ төҙөлә. Ул яңы төҙөлештә электроэнергия менән тәьмин итәсәк.

— — —

Мылтыҡтан атыуҙың донъя рекорды

ЛЕНИНГРАД. (ТАСС). Ошо көндәрҙә үткәрелеп ятҡан округтарҙың атыу буйынса ярыштарында спорттың атҡаҙанған мастеры гвардия подполковнигы Николай Богданов мылтыҡтан атыуҙың донъя әһәмиәтендәге яңы рекордын бирҙе.

Богданов «боевой стандарт» атыуын үтәп (ятып, теҙләнеп, аяҡ өҫтө баҫып атыуҙан) алырға мөмкин булған 600 очконан 541 очко алды.

Төҙ атыусыларҙың береһе лә донъяла быға тиклем бындай рекордҡа өлгәшә алғаны юҡ ине әле. Богданов был тәр атыуҙа Бөтә Союз рекордынан ике очкоға һәм донъя рекордынан 11 очкоға өҫтөнлөк алды.

Промартелдә

[illegible] трамвай һеҙҙе Глумилин [illegible] майҙанына алып бара. Майҙанға [illegible] биналар күренгеләй. Тәүге ҡарашҡа улар ябай ғына булып [illegible]. Ләкин эстәренә инһән, [illegible] заводтың цехындағы кеүек эш ҡайнай.

Беҙ цехтарҙың береһенә, ҙур булмаған бинаға инәбеҙ. [illegible] станоктар [illegible]. Шунда [illegible] ҡыҙҙар эшләп ултыралар. [illegible] Артель председателе Лазарь Абрамович Вассерман беҙгә [illegible] менән таныштырып сыҡты. [illegible]

Нескә эш талап иткән [illegible] республикабыҙҙа [illegible] Мастер Вера Рева [illegible] артелдә Башкорт, татар һәм рус ҡыҙҙарынан [illegible]

Бынан бер нисә йыл ғына элек был артелдә тик сүс аркандар һәм бер нисә төр генә хужалыҡ тауарҙары эшләп сығарылған. Хәҙер уның ассортиментенда ундарса төр продукциялар күрергә була. Ул үҙенең эш күләме яғынан ҙур бер производство предприятиеһенә тиң булырлыҡ артелгә әүерелә. Үткән йылда балыҡ ауҙары, металл сыбыҡтарҙан тростар, шпагат һәм күп кенә башҡа продукциялар етештереү үҙләштерелгән.

Фиҙакәр хеҙмәт һәм эштә берҙәмлек, урындағы сырьеларҙы киң файҙаланыу юлдарын эҙләп таба белеү артель члендәренә дан килтерә. Артель Башҡортостан промкооперация системаһындағы артелдәр араһында үҙенә маҡтаулы урын яулап ала. Бирелгән производство программаларын систематик арттырып үтәүгә өлгәшә һәм биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышта респуб[illegible] артелдәре араһында алдынғы урындарҙың береһен тотып килә.

Коллектив үткән йылда йыллыҡ производство планын байтаҡ артығы менән тамамлап, [illegible] киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарҙы. [illegible]

М. Стрежова, М. Климина, А. Мошкина, Е. Уткина, Долотовская, А. Полозова, К. Васильева, З. Кузнецова, Александрова кеүек [illegible] стахановсылар [illegible] Социалистик ярышта өлгәшкән уңыштары өсөн [illegible] БАССР промкооперацияһы идаралығы тарафынан почет грамоталары менән наградланды.

[illegible]

Коллектив социалистик ярышты киңерәк йәйелдерә барып, алдағы йылда тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәр биреү өсөн намыҫлы рәүештә көрәшә. 1948 йылдың беренсе квартал планын арттырып үтәп, артель өс йөҙ мең һумдан артығыраҡ киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарҙы һәм тәүге ике ай эсендә йөҙ мең һум самаһы накопление бирҙе. Социалистик ярышта яҡшы күрһәткестәре өсөн артель ғинуар һәм февраль айҙарының эш йомғаҡтары буйынса БАССР Министрҙар Советы тарафынан ике тапҡыр аҡсалата премия алды.

Артелдең алдағы перспективаһы тағы ла ҙурыраҡ. Коллектив быйыл күберәк продукция эшләп сығарыу, производствоны киңәйтеү бурысын ҡуйҙы һәм ошо бурысын тормошҡа ашырыу өсөн эске мөмкинлектәрҙе файҙаланыу саралары билдәләне.

Гәрәй Әмир.

Уңышты нығытыу өсөн

«Башстрой» трест үткән йыл планды үтәмәне. Управляющий Конкин һәм парторг Трофимов иптәштәр коллективте артта ҡалыуҙы бөтөрөүгә туплаттылар. Һөҙөмтәлә беренсе квартал планы 103 процентка үтәлде һәм зарар күреү бөтөрөлдө тип әйтерлек.

Коллектив май алды ярышына ҡушылып, өлгәшелгән уңышты нығытыу өсөн апрель айы заданиеһен срогынан биш көн алда үтәүгә йөкләмә алды. Тресттың күп стахановсылары йөкләмәләрҙе арттырып үтәйҙәр. Ташсылар И. Романенко, Н. Старцев, штукатурщик А. Осипова, Г. Фатихов, С. Филатов, күптән түгел ФЗО мәктәбен тамамлаған П. Васильев етәкселек иткән йәштәр бригадаһы һәм башҡа тиҫтәләгән эшселәр бер ярым-ике норма бирәләр.

А. Кальметьев.

Совет кешеләренең героик хеҙмәте — совет патриотизменең юғары кәүҙәләнеше

I.

Илебеҙҙең һуғыштан һуңғы үҫеше етештереүҙең тайпылышһыҙ күтәрелеүе, хеҙмәтсән массаларҙың ижади инициативаһының артабан үҫеүе менән характерлана. Совет кешеләре һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты үҙҙәренең иң яҡын эше итеп ҡабул иттеләр. Улар фабрикаларҙа һәм заводтарҙа, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа, шахталарҙа һәм тимер юл транспортында, мәғариф, фән һәм искусство өлкәһендә үҙ-үҙҙәрен аямай хеҙмәт итәләр, дәйөм халыҡ интерестәрен иң юғары аңлағанлыҡтарын күрһәтәләр. Совет эшселәре, крәҫтиәндәре һәм интеллигенция, үҙҙәренең эштәрендә тарихта бөйөк патриотизмды кәүҙәләндереп, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн, совет государствоһының ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн көрәш алып баралар.

Совет патриотизмы помещиктар һәм капиталистар власен ҡолатҡандан һуң һәм совет власы урынлаштырылғандан һуң барлыҡҡа килде, ә совет Тыуған иле өсөн һуғыштарҙа һәм социалистик общество төҙөү барышында нығыны һәм хәрәкәт иттереүсе ҡеүәтле көс булып әүерелде.

Серегән иҫке ҡоролошҡа ҡаршы революцион һуғыштарҙа большевиктар хеҙмәтсән массаларҙы шундай бөйөк патриотизмдың нигеҙен һалдылар, ул совет ҡоролошо шарттарында коммунизмдең ҡеүәтле, еңелмәҫлек көсөнә әүерелде.

Совет кешеләре социализмдең еңеүе өсөн көрәштә, үҙҙәренең социалистик Тыуған илдәренең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәштә, үткәндең алдынғы традицияларын дауам иттереп, үҙҙәренең ата-бабаларының патриотик эштәрен арттырып, яңы, сифат яғынан бөтөнләй патриотизм үҫтерҙеләр, ул патриотизм иҫке общество патриотизменән тамырынан айырыла. Совет патриотизмы — ул патриотизмдең яңы юғары тибы.

Совет Тыуған иле — хеҙмәтсәндәрҙең тарихта беренсе Тыуған иле. Совет государствоһы — ул эшселәрҙең һәм крәҫтиәндәрҙең социалистик государствоһы. Ул илебеҙҙә йәшәгән барлыҡ милләттәрҙең хеҙмәтсән массаларының интерестәрен яҡлай. Совет ҡоролошо — донъяла иң азат ҡоролош. Ул халыҡтың барлыҡ ижади көстәрен ҡоллоҡтан ҡотҡарҙы, хеҙмәтсәндәрҙең материаль һәм культура-тормош кимәлен капитализм шарттарында мөмкин булмаған юғарылыҡҡа күтәрҙе. Бына ни өсөн совет кешеләре үҙҙәренең социалистик Тыуған иленә, Ленин—Сталин партияһына, коммунизмға икһеҙ-сикһеҙ бирелгәндәр.

Беҙҙең халҡыбыҙ үҙенең социалистик ҡоролошҡа бирелгәнлеген сталинсе биш йыллыҡтарҙа асыҡ күрһәтте. Ул биш йыллыҡтар илебеҙҙе артта ҡалған ил-ән алдынғы илгә, аграр илдән индустриаль илгә, экономик һәм хәрби яҡтан ҡеүәтле державаға әүерелдерҙеләр. Совет халҡы был бирелгәнлекте Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла күрһәтте. Унда ул үҙ Ватанының ғына азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡлап ҡына ҡалманы, бәлки Европа халыҡтарын Гитлер ҡоллоғонан ҡотҡарҙы, донъя цивилизацияһын һаҡлап алып ҡалды. Совет кешеләре һуғыштан һуңғы бурыстарҙы хәл итеүҙә лә бөйөк патриотизм күрһәтәләр.

Дошман тарафынан емерелгән ҡалалар һәм ауылдар, фабрикалар һәм заводтар совет кешеләренең ижади хеҙмәте менән күтәреләләр, яңы промышленность предприятиелары, электр станциялары барлыҡҡа килтерелә, беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙҙең экономик ҡеүәте үҫә һәм нығый.

II.

Совет власы йылдарында беҙҙең илебеҙ танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе, уның ҡалалары һәм ауылдары ҡайтанан ҡоролдолар, уның кешеләре лә бөтөнләй башҡаса кешеләр булып әүерелделәр. Совет ҡоролошонда яңы быуын кешеләре үҫтеләр, улар үҙҙәренең ҡеүәтле ижади көстәрен, хеҙмәт энергияларын, оҫталыҡтарын, үҙҙәренең һәләтлектәрен социалистик Тыуған ил бәхете өсөн актив рәүештә файҙаланалар.

«Шуны танырға кәрәк, кешеләрҙең яңы рухани төҫ алыуҙары һәм уларҙың совет патриоттары сифатында идея яғынан үҫеүҙәре революциябыҙҙың бик мөһим ҡаҙанышы булып тора. Был бөтә совет кешеләренә, ҡалаға ла, ауылға ла, физик хеҙмәт кешеләренә лә, аҡыл хеҙмәте кешеләренә лә ҡайтып ҡала. Октябрь революцияһының бөтә донъя күләмендә тарихи әһәмиәткә эйә булып торған бөйөк уңышы шунан тора» (В. Молотов).

Совет кешеләренең рухани төҫө, уларҙың идея яғынан үҫеүҙәре бөтәһенән элек уларҙың хеҙмәткә совет общество алдында, социалистик государство алдында изге бурыс итеп ҡарауҙарында күренә. Совет патриоттары үҙҙәренең хеҙмәттәрен дөйөм халыҡ хеҙмәтенең бер өлөшө, совет государствоһының экономик һәм хәрби ҡеүәтен нығытыусы өлөшө итеп ҡарайҙар.

Капиталистик общество шарттарында хеҙмәт ирекһеҙләү, ҡоллоҡ характерен алып тора. Хеҙмәттең капиталистик ойошторолошо фәндең бөтә ҡаныҙаларе буйынса эшсенең тирен һығып сығарыу оҫталығына ҡоролған. Капитализмда хеҙмәт үҙенең һәр төрлө ижади көсөн, ылыҡтырыусы характерен юғалтты, сөнки ул үҙен өсөн түгел, ә башҡалар, эксплоататорҙар өсөн эшләү булып тора.

Совет ҡоролошонда хеҙмәт тарихта беренсе тапҡыр общество тарафынан танылды, ә хеҙмәт кешеләре почетлы граждандар булып әүерелделәр. Советтар Союзында кешеләр эксплоататорҙарға түгел, үҙҙәренә, үҙҙәренең обществоһына — власть башында халыҡ араһынан сыҡҡан кешеләр торған обществоға эшләйҙәр. Шуға күрә Советтар Союзының граждандары үҙҙәренең хеҙмәттәренә беренсе бурыс итеп, общество алдында үҙҙәренең юғары бурыстары итеп ҡарайҙар.

Социализм беҙҙең кешеләребеҙҙең бөтә ҡараштарында тамырынан переворот яһаны һәм был бигерәк тә хеҙмәткә ҡарашҡа киҫкен йоғонто яһаны. Хеҙмәт намыҫ, дан, батырлыҡ һәм геройлыҡ эше булып әүерелде, ә хеҙмәт кешеләре — иң почетлы граждандар булып әүерелделәр.

Совет обществоһында граждандың дәрәжәһе уның тик шәхси һәләтлеге, общество файҙаһына уның хеҙмәте менән генә билдәләнә. Әгәр ул яҡшы эшләй икән, бөтә көсөн, һәләтлеген общественный хужалыҡты үҫтереүгә бирә икән, ул иғтибар һәм почет менән солғап алына.

Бер генә буржуаз илдә лә ябай кешеләр үҙҙәренең яҡшы хеҙмәттәре һөҙөмтәһендә бөтә халыҡтың таныуына, обществоның таныуына өлгәшә алмайҙар. Беҙҙең илебеҙҙә был ғәҙәттәге эш булып әүерелде, шуның менән бергә хеҙмәттең бөтә төрҙәре, иң ябайынан алып иң ҡатмарлыһына тиклем, беҙҙә тейешле иғтибар менән, государство тарафынан булышлыҡ менән файҙалана. Игенсе иң күренекле ғалим, артист йәки яҙыусы кеүек үк дан яулап алыуға өлгәшә ала.

Был хәл совет кешеләрен хеҙмәттә бөйөк активлеккә һәм ижади инициативаға рухландыра. Был активлек хәҙер массовый, бөтә халыҡ эше булып әүерелгән социалистик ярышта үҙенең кәүҙәләнешен таба. Ҡаланың һәм ауылдың миллиондарса хеҙмәтсәне ҡатнашҡан социалистик ярыштың киң ҡоласы совет кешеләренең коммунистик аңлылығының юғары кимәле, уларҙың патриотизменең бөйөк көсө тураһында дөрөҫләй.

Сталинсе яңы биш йыллыҡты үтәү һәм арттырып үтәү өсөн көрәш барышында социалистик ярыштың яңы формалары тыуҙы. Был формалар иҫәбенә айырым эшселәрҙен йыллыҡ һәм тотошо менән биш йыллыҡ производство пландарын срогынан алда үтәү буйынса алған йөкләмәләре инә. Был йөкләмәләр намыҫ менән үтәләләр. Бына бер нисә миҫал:

«Сталинуголь» комбинатының № 3-бис шахтаһы проходчиге Малиновский һәм уның бригадаһы биш йыллыҡ норманы үтәнеләр инде. Улар ҡалған өс йылда тағы ла бер биш йыллыҡ норма үтәргә вәғәҙә иттеләр. Был комбинаттың машинисы Герасим Запорожец үҙенең биш йыллыҡ нормаһын ике йылда үтәне. Ул 1949 йылдың декабренә ике биш йыллыҡ план үтәргә, йәғни яңы биш йыллыҡтың дүрт йылында күмер сығарыуҙың ун йыллыҡ нормаһын бирергә яңы йөкләмә алды.

Глуховск комбинатының ватерщицаһы Нина Соловьева биш йыллыҡты дүрт йылда үтәргә йөкләмә алды. Ул, 2200 орсоҡта хеҙмәтләндереп, 1947 йылда пландан тыш 9,5 тонна еп бирҙе.

Ун меңдәрсә эшселәр үҙҙәренә төрлө йөкләмәләр алалар һәм уларҙы тормошҡа ашыралар.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа социалистик ярыштың коллектив стахановсы эш кеүек формаһы киң таралды. Мәскәүҙәге «Парижская коммуна» фабрикаһы эшсеһе Василий Матросов, технолог Александр Иванов, мастер Николай Российский һәм башҡа совет

(Аҙағы 3-сө биттә).

Фәнни батырлыҡ

(Бөйөк рус сәйәхәтсеһе Н. Н. Миклухо-Маклайҙың үлеүенә 60 йыл тулыуға ҡарата)

Бөйөк рус сәйәхәтсеһе һәм атаҡлы ғалим Николай Николаевич Миклухо-Маклайҙың үлеүенә 14 апрелдә 60 йыл тулды.

Совет халҡына уның исеме ғалимдең тулы тикшеренеүҙәре һәм уның яңылыҡ асыуҙары, рус фәнен байытыуы һәм [illegible] исеме менән генә хәҙерҙә түгел. Беҙҙең халҡыбыҙ Ватаныбыҙ был ҙур патриотын уның эшмәкәрлеге — [illegible] патриотизм менән һуғарылғанлығы өсөн дә ҙурлай һәм һөйә.

Николай Николаевич 1846 йылдың 17 июлендә, Боровичи ҡалаһына яҡын торған Рождественский ауылында тыуа. Ул уҡ ете йәшендә Петербург университетенең физика-математика факультетына ихтыяри уҡыусы булып инә. [illegible]

[illegible] йылдарҙа ул Европа университеттарында белем алыуҙы дауам итеп килеп, Канарала, Сицилия утрауында һәм [illegible] сәйәхәт ҡыла. [illegible]

Миклухо-Маклай 1869 йылда уҡ Ватанына ҡайтып, [illegible]

Миклухо-Маклай 1870 йылдың октябрендә рус карабы «Витязь»-ҙа Кронштадт ярынан йөҙөп китә. [illegible]

[illegible]

Яңы Гвинеяға беренсе сәйәхәттән һуң Миклухо-Маклайҙың [illegible] сәйәхәте була. Николай Николаевич шулай уҡ Тымыҡ океандың башҡа утрауҙарын да йөрөп сыға, Малакка ярым утрауының [illegible] сәйәхәт яһай.

Рус тикшеренеүсеһенең уны шул ваҡыттағы этнографтарҙан айырып [illegible]

[illegible]

тәрҙә була, уларҙың обществоһы торошо — [illegible]

[illegible]

Лев Толстой, үҙ ваҡытында, Николай Николаевичтең сәйәхәтенә һоҡланыулы баһа биреп, ошолай яҙа:

«Минә беҙҙең эшмәкәрлегебеҙҙә шул таң ҡалдыра һәм һоҡландыра, мин- биҙдәле булыуынса, һеҙ иң беренсе булараҡ үҙ тәжрибәгеҙ менән кешенең бөтә ерҙә лә кеше икәнен раҫланығыҙ йәғни иҙгелекле, кешеләрсә һәм менән, бары иҙгелек һәм хаҡлыҡ менән генә аралашырға мөмкин, ә пушка һәм араҡы менән түгел икәнен үҙегеҙҙен мисал өсөтөрсә батырлығығыҙ менән раҫланығыҙ. Һеҙҙең ҡырағайҙар менән аралашыу тәжрибәгеҙ фәнгә, иҫи дә хеҙмәт иткән фәнгә, кешеләр бер-береһе менән нисек йәшәргә тейешлеген күрһәткән дәүер аса. Һеҙҙән сығышығыҙ шул тарихта һәм һеҙ кешелек өсөн ҙур һәм яҡшы хеҙмәт күрһәткән булырһығыҙ».

Николай Николаевич 1888 йылда, ныҡ ауыр тулы ваҡытта, ... тыныҡ икенсе йәшендә үлде. Ул үҙ хеҙмәттәрен матбуғатҡа сығара алманы. Һәм яҙмалар, ғалимдең үлеүенән һуң 35 йыл тын ятҡандан, эйәләнгән аттылар. Улар бары тик бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң ғына донъя күрҙеләр: 1923 йыл мәрхүмдең Яңы Гвинея буйынса сәйәхәт көндәлектәре баҫылды. Һуңғы йылдарҙа СССР Фәндәр Академияһының этнография институты Миклухо-Маклайҙың ике том «Сәйәхәттәрен» баҫып сығарҙы.

Гүзәл рус сәйәхәтсеһе һәм ғалиме, артта ҡалған һәм иҙелгән халыҡтарҙы яҡлаусы, уларҙың азатлығын һәм үҙҙәрен билдәләү хоҡуҡтарын һаҡлаусы, бөйөк гуманистың иҫтәлеге совет халҡы һәм бөтә прогрессив кешелек хәтерендә мәңге һаҡланыр.

Профессор **Н. Н. Винников.**

Указ батыр хеҙмәткә дәртләндерҙе

СССР Верховный Советы Президиумының 2 апрель Указдары беҙҙең Маҡар районы Сталин исемендәге колхоздың члендарын яңы хеҙмәт күтәрелешенә дәртләндерҙе. Был Указдарҙы өйрәнеүгә арналған дөйөм йыйылышта колхозсылар быйыл сәсеү майҙанын, үҙған йылғыға ҡарағанда, 250 гектарға киңәйтергә, ә бойҙай сәсеүлеге майҙанын өҫтәмә арттырырға һәм бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 85-әр бот урожай алырға ҡарар иттеләр. Коммунист иптәш Хужахмәтов бригадаһы 100 гектар арыштың һәр гектарынан 120-шәр бот урожай алырға һүҙ бирҙе.

Колхоз яҙғы сәсеүгә тулыһынса әҙер. Колхозсылар бөгөн-иртәгә сәсеүҙе башларға торалар. Ө ужым баҫыуҙарында инде 9 звено сәсеүлектәрҙе аҙыҡландырыу эшенә тотондо.

Н. Янбаев.

—☆—

Тырматыу эше башланды

БҮЗДӘК. (Телефон аша). Райондың бөтә колхоздарында, тип әйтерлек баҫыу эштәре башланды. Ҡар һыуҙарын тотоу, ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу саралары массовый рәүештә үткәрелә.

Урындағы һәм минераль ашламалар менән ужым аҙыҡландырыу эшен районда беренсе булып «Октябрь» колхозы башланы. Был сара бында 50 гектар майҙанда үткәрелде. «Заря», Тимирязев һәм Буденный исемендәге колхоздарҙа тиҫтәләрсә гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды. 5 көн эсендә районда 1.500 гектарҙан күберәк майҙанда аҙыҡландырыу үткәрелде.

Ворошилов исемендәге колхозда звенолар орлоҡ участкаһында күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәрен тырматыуҙы башланылар. Тәүге көндә баҫыуҙа 12, ә икенсе көндә 14 тырма эшләне. «Октябрь» һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа ла орлоҡ өсөн үҫтерелә торған күп йыллыҡ үлән сәсеүлектәре тырматыла. Районда тәүге 100 гектар үлән баҫыуы тырматылды инде.

—☆—

Ремонтсылар яҡшы эшләйҙәр

ӘБЖАН. Зянчура һарыҡсылыҡ совхозы ремонтсылары ауыл хужалығы ҡоралдарын һәр ваҡыт алдан әҙерләйҙәр. Бында яҙғы сәсеүҙә эшләйәсәк тракторҙар, һабандар һәм сәскестәр күптән үк ремонтланғайнылар. Хәҙер бесән сапҡыстарҙы һәм бесән йыйғыстарҙы ремонтлау эше йәйелдерелде. Мастерскойҙа эшләүсе тракторист Собхан Ишемьяров, тимерсе Андрей Канапалов, токарь Хәкиәхмәт Ҡыуатов һәм башҡа иптәштәр 20 косилканы яҡшы сифатлы итеп ремонтланылар ҙа инде.

К. Сафин.

„Сулпан“ колхозы кешеләре

Яҙғы йылы ҡояш ҡалҡыуҙа ултырған бәләкәй генә колхоз ауылы өҫтөнә яғымлы нурҙарын һибә. Колхоз правлениеһе өйө эргәһендәге баҡсала емеш, ағастары бөреләренән яҙ еҫе килә. Тиҙҙән баҫыуға, сәсеүгә!

Бына шундай матур көндәрҙең береһендә «Сулпан» колхозына шатлыҡлы ҙур хәбәр килде. Колхоздың 5 иң алдынғы кешеһе арыш һәм бойҙайҙан юғары урожай алғандары өсөн СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланғандар. Был хәбәрҙе ишеткәс, колхозсылар өйҙән-өйгә йөгөрҙөләр, правлениеға ашып ултырҙылар.

— Ҡотло булһын әле булэк! — тиҙәр улар наградланыусыларға.

«Сулпан» колхозы Бүздәктән бер генә километр алыҫлыҡта.

— Күптән түгел әле был ерҙәрҙә һаҙлыҡ булған, — тип һөйләйҙәр ҡарттар. — «Ҡара бурандың» ҡотора торған урыны ла ошо беҙҙең яҡ далалары инде. Ул саҡта ағас-фәлән юҡ ине яланда. Йәй көнө, ҡоро ваҡытта, баҫыуҙа өйөрмә күтәрелеп, бөтә ҡара тупраҡты осора ла бөтөрә, игендәрҙең тамыры тупраҡһыҙ — аҙыҡһыҙ ҡала. Иген булмай торғайны был ерҙәрҙә...

Тиҡ колхоз кешеләре «ҡара буранды» йегәнләргә лә, һаҙлыҡты киптерергә лә юл таптылар. Хәҙер ер танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. «Сулпан» колхозы баҫыуҙары дүрт яҡтан да һәм-йәшел ағастар менән уратып алынғандар, бейек, ҡуйы булып үҫә бындағы ағастар. Ер йылдан-йыл яңыра бара. Бында кешеләр иген генә түгел, емеш-емеш ағастары ла үҫтерәләр.

— Йәй көнө, — ти колхоз председателе Байков, — беҙҙең колхоз курорт кеүек була. Элек ер ҡыҫыр, уңдырышһыҙ ине. Хәҙер бында «Сулпан» колхозы ҡыҙҙары Сания һәм Хатима Мөрсәлимова звенолары гектарҙан 20—25-әр центнер бойҙай һәм арыш урожайы алалар. Элек кешеләрҙең буралары буш булған. Хәҙер 65 йәшлек Мөнәүир бабай Сыртланов семьяһы үткән йыл хеҙмәт көнөнә 246 бот иген алды.

— Беҙ хеҙмәт көнөнөң ҡәҙерен беләбеҙ, — тиҙәр колхозсылар, — сөнки улар күҙ күнә ауыр тарталар. Ысындан да, 1947 йылда һәр хеҙмәт көнөнә 5 килограмм 650 грамм иген бүленде, уның 4 килограмы бойҙай булды, өҫәр килограмм бәрәңге һәм 2 һум 70-әр тин аҡса тиҙе.

— Быйыл хеҙмәт көнөнә унар килограмм иген алырға, тип уйлап торабыҙ инде беҙ, — ти Суфия апай Байкова. «Сулпан» колхозы үҙған йыл государствоға иген тапшырыу планын 140 процентҡа үтәне, малсылыҡ продуктыларының бөтә төрҙәре — ит, һөт, йөн тапшырыу планы 1948 йыл өсөн дә үтәлгән. «Сулпан» колхозы 1945 йылдан алып баҫыу эштәренә звено системаһы индерҙе. Колхоз бәләкәй булһа ла, бер атҡа 25 гектар ер эшкәртергә тура килә. Үҙған йыл колхоз һәр гектар ерҙән уртаса 12,5 центнер урожай алды, 18 гектар арыштың һәр гектарынан 24,9-ар центнер, 20 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 21-әр центнер иген алынды. 1944 йылда колхоздың аҡсалата доходы 44 мең һум булһа, 1947 йылда ул икеләтә үҫте—колхоз 87 мең һум аҡсалата доход алды.

— Колхоздың биш йыллыҡ планы бар, — ти иптәш Байков. — Быйыл электр индерәбеҙ. 50 һыйыр өсөн яңы торлаҡ, келәттәр, сушилка һәм клуб һаласаҡбыҙ. Бына был правление эргәһендәге баҡсаны анау ҡойоға тиклем еткерергә уйлайбыҙ. Ауылды бөтә яҡтан да баҡса менән әйләндереп алырға кәрәк булыр. Ун баҫыулы сәсеү әйләнешенә күсәбеҙ. 1950 йылда һәр гектарҙан уртаса 18-әр центнер иген алырға план бар.

Кешеләрҙе ойоштороуҙа, колхозды аяҡҡа баҫтырыуҙа, юғары урожай алыуҙа председатель коммунист, фронтовик Байковтың хеҙмәте ҙур. Шуның өсөн ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланды.

Наградланыусылар араһында ике туған һеңелдәр Сания һәм Хатима Мөрсәлимовалар — арыш һәм бойҙайҙан юғары урожай алған звеноводтар, комсомолкалар. Уларға әле 18—20 генә йәш. Шулай ҙа уларҙың звенолары Бүздәк районында бик яҡшы беләләр. Ҡыҙҙар икеһе лә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре менән наградландылар.

Үҙған йыл Сания звеноһында уның атаһы Яҡуп Мөрсәлимов ағай эшләне. Элекке фронтовик йәйен эшләгән өсөн өҫтәмә түләү тәртибендә генә күп иген алды, ә бөтәһе Яҡуп ағайҙың келәтенә 264 бот иген инде. Яҡуп ағай һәм колхозсы Гөлнәркә Ҡотошева «Хеҙмәт батырлығы өсөн» миҙалы менән наградландылар.

— Фронттан да награда менән ҡайтты, хәҙер ҙә награда алды,— ти председатель Байков Яҡуп ағай тураһында.

Хәҙер тағы ла юғарыраҡ урожай өсөн көрәш бара.

— Сәсеүҙе һабан туйын көткәндәй көтәбеҙ инде, — тиҙәр «Сулпан» колхозының члендәре.

Таң алдынан яҙғы аяҙ төндә халҡтың һөйгән йондоҙо — Сулпан ҡалҡа. Ошо йондоҙ исеме менән аталған «Сулпан» колхозы кешеләренең дә йөҙҙәре яҡты. Уларҙың алдынғыларҙан алдынғылары күкрәгендә Ватан ордендәре балҡый. Был элек һаҙлыҡ булған урынды гүзәл баҡсаға, алтын иген диңгеҙенә әйләндергән ергә «Сулпан» колхозсыларына ҡушылып:

Элек дала булған ерҙә
Үҫәләр алыу гөлләр,
Сулпандан яҡты күренә
«Сулпанда» килер көндәр, —

тип йырлаһы килә.

Ғ. Рамазанов.

Донник—бал ҡорттары өсөн яҡшы аҙыҡ базаһы

Бал ҡорттарын етерлек аҙыҡ базаһы менән тәьмин итеү—уларҙың һанын һәм бал биреүен арттырыуҙа ҙур роль уйнай.

Республикабыҙ колхоздарында сәселә торған ауыл хужалығы культураларының баллы бик һуңлап бирә башлауҙары һәм ялан райондарында тәбиғи болонлоҡтарҙың аҙ булыуы һөҙөмтәһендә аҙ көнә ҡорттар бал өлгөргәнгә тиклем өҫтәмә аҙыҡландырыуға бик мохтаж булалар. Шуға күрә лә күп кенә колхоздарҙа аҙ көнә бал ҡорттарын һаҡлап алып ҡалыу өсөн шәкәр һатып алыуға йыл һайын күп кенә расход тоторға тура килә һәм хатта ҡайһы бер колхоздарҙа был тармаҡтан күп доход алыу урынына, киреһенсә, ҙур зарар күрәләр.

Умартасылыҡты колхоз хужалығының күп доход биреүсе тармағына әйләндереү өсөн уны етерлек аҙыҡ базаһы менән тәьмин итеү тураһында хәстәрлек күрергә кәрәк. Ҡоролоҡло ялан райондарында һары һәм аҡ донник үләнен сәсеүҙе киң ҡулланыу бал ҡорттарын аҙыҡ базаһы менән тәьмин итеүҙә мөһим сара булып тора. Быны Әлшәй районы колхоздарының эш тәжрибәһендә бик яҡшы күрергә була. Мәҫәлән, 1 гектар донник сәсеүлеге 5-әр центнер һәм унан да күберәк бал бирә ала. Шул уҡ ваҡытта ул башҡа культураларға ҡарағанда күп иртә, 15—20 июндән дә һуңға ҡалмай, бал бирә башлай. Хатта үҙған йыл аҙ оҙаҡ һәм һалҡын булыуға ҡарамаҫтан, Әлшәй районы колхоздарында донниктан бал йыйыу беренсе июлдә башланды.

«Ленинская победа», Киров һәм Антонов исемендәге колхоздар 1942 йылда районда беренсе булып бал культураһы сәсеүҙә киң ҡуллана башланылар. Шуның арҡаһында был колхоздар өҫтәмә рәүештә унарлаған центнер бал алдылар. Мәҫәлән, «Ленинская победа» колхозы 1942 йылда һәр бер күс умартанан 86-шар килограмм бал алыуға өлгәште.

1946 йылда был колхозда председатель булып эшләй башлаған иптәш Кравченко донникте үҙ ваҡытында, яҡшы сифатлы итеп сәсеүҙе баһаламаны. Шуның һөҙөмтәһендә бер гектар майҙанда донник бөтөнләй сыҡмай ҡалды, ә 6 гектар майҙанда һирәк кенә булды. Бал ҡорттары өсөн тейешле аҙыҡ базаһы булдырмау һөҙөмтәһендә, элекке йылдарҙа районда беренселекте алып килгән тәжрибәле умартасы иптәш Руденко үҙған йыл 28 центнер балды алып еткермәне. Ә Киров исемендәге колхоздың умартасыһы иптәш Сазонов донник сәсеүҙе киң ҡулланыу һөҙөмтәһендә, йәйҙең насар килеүенә ҡарамаҫтан, һәр бер умартанан 55-әр килограмм бал алып, иптәш Руденконы уҙып китте.

Бына шуға күрә лә умартасылыҡты артабан үҫтереү һәм унан күп доход алыу өсөн ағымдағы йылдан башлап һәр бер колхозда донник сәсеүҙе киң ҡулланырға кәрәк.

«Ленинская победа» колхозы быйыл үҙған йылғы хаталарҙы ҡабатламау өсөн көрәшә. Яҡын ике-өс йыл эсендә бал ҡорттары семьяларын икеләтә арттырыу һәм һәр умартанан 90-шар килограмм бал алыу бурысы ҡуйылды. Бал ҡорттарына етерлек аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн колхоз быйыл 40 гектар майҙанда донник сәсәсәк һәм районың башҡа колхоздары өсөн дә күп кенә донник орлоғо етештерәсәк.

Районда үҙған йыл 160 гектар майҙанда донник үләне сәселһә, быйыл уның сәсеү майҙаны 200 гектарға еткереләсәк һәм бал ҡорттарын үрсетеүгә, унан күп доход алыуға ныҡлы иғтибар ителәсәк.

Агроном **Н. Саламатин.**

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

[illegible] инициативаһы [illegible] рационализаторлыҡ практикаһында үҙенең кәүҙәләнешен таба. Тик 1946 йылда ғына 250 меңдән артыҡ рационализаторлыҡ тәҡдиме тормошҡа ашырылды. Был тәҡдимдәрҙең бер өлөшөн генә ҡулланыу ҙа ике миллиард һум күләмендә экономия бирҙе. 1947 йылда тормошҡа ашырылған рационализаторлыҡ тәҡдимдәренең һаны байтаҡ артты һәм средстволарҙы тағы ла күберәк экономиялауҙы тәьмин итте.

Социалистик тәҙәлөш темптарын тиҙләтеү өсөн көрәштә хеҙмәтсәндәр яңынан-яңы рекордтарға өлгәшәләр.

Стахановсыларҙың производство уңыштары СССР эшселәр синыфының культура-техник күтәрелешенең күрһәткесе булып тора һәм хужалыҡтың совет социалистик системаһы шарттарында хеҙмәт етештереүсәнлегенең яңы үҫеүенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөмкинлеге тураһында дөрөҫләй.

Социалистик ярыш ауылда ла ҡеүәтле рәүештә йәйелде. Был хәрәкәткә барлыҡ колхоз крәҫтиәндәре ҡушылдылар. ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашыра барып, республикаларҙың, крайҙарҙың, өлкәләрҙең крәҫтиәндәре үҙ өҫтәренә 1947 йылда юғары урожай үҫтерергә йөкләмә алғайнылар. Колхоз крәҫтиәндәре үҙ йөкләмәләрен үтәйҙәр. Улар дөйөм халыҡ интереҫен юғары [illegible] конкрет эште [illegible]

[illegible] Воронеж өлкәһен алайыҡ. Бында юғары урожай өсөн ярышта 8 мең баҫыусылыҡ бригадаһы, 20 меңдән артыҡ звено, 3686 колхоз, барлыҡ МТС-та ҡатнашты. Ярышта ҡатнашыусылар гүзәл һөҙөмтәләргә өлгәштеләр. Күп колхоздар биш йыллыҡ аҙағына билдәләнгән урожайлыҡ планын арттырып үтәйҙәр. Өлкә государствоға пландан тыш 11 миллион бот иген тапшырып иген әҙерләү йыллыҡ планын срогынан алда—7 сентябргә үтәне. Өлкәләге 85 ауыл хужалығы районынан 82 район государствоға иген тапшырыу планын арттырып үтәне.

Ауылда ярыштың массовый булыуын, уның ҙур көскә эйә булыуын күрһәтеүсе бындай миҫалдар аҙ түгел. Миллиондарса совет кешеләрен солғап алған социалистик ярыш идеялары илебеҙҙе тиҙ темптар менән алға алып барыусы ҡеүәтле материаль көс булып әүерелде.

Ләкин күп кенә кешеләрҙең аңында капитализм ҡалдыҡтары әле һаман йәшәгәнлеген оноторға ярамай. Беҙҙә шундай кешеләр бар әле, улар обществоға әҙерәк бирергә һәм унан күберәк алырға тырышалар, йәки бөтә халыҡ интереҫтарына зыян килтереп, үҙҙәренең шәхси интереҫтарын ҡайғыртып башҡаларҙың иҫәбенә байырға маташалар. Беҙҙең партия үткәндең ҡалдыҡтарына ҡаршы арымай-талмай көрәш алып бара. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе киң йәйелдереү кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү һәм социалистик хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн көрәштә ҡеүәтле ҡорал булып тора. Алдынғыларҙың патриотик өлгөһө бөтә совет граждандарын коммунистик обществоның актив һәм аңлы төҙөүселәренә әүерелдереү эшендә ғәйәт ҙур роль уйнай.

III.

Сталинсә яңы биш йыллыҡта совет кешеләренең үҙ-үҙҙәрен аямай эшләүҙәре һәм патриотизмы арҡаһында йыллыҡ производство пландары арттырылып үтәлә.

Бөтә промышленностең валовой продукция сығарыу планы 1947 йылда 103,5 процентҡа, ә биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планы —100 процентҡа үтәлде. Яңы биш йыллыҡтың ике йылы эсендә 1900-гә яҡын государство предприятиеһе аяҡҡа баҫтырылды һәм эшкә ҡушылды. Беҙ промышленность продукцияһы етештереүҙең һуғышҡа тиклемге кимәленә өлгәштек инде, шул уҡ ваҡытта Европалағы капиталистик илдәрҙең береһе лә, Советтар Союзына ҡарағанда сағыштырмаҫлыҡ, аҙ зыян күргән булһа ла, үҙенең промышленноһен һуғышҡа тиклемге кимәлгә күтәрә алғаны юҡ әле.

Беҙҙең социалистик игенселектең дә уңыштары ҙур. 1947 йылда ауыл хужалығының валовой продукцияһы 22 процентҡа, а игенселектен валовой продукцияһы—48 процентҡа артты. Бөртөклө иген етештереү 58 процентҡа артты. Аҡса реформаһы, аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙарына карточкаларҙы бөтөрөү шулай уҡ совет экономикаһының ҡеүәтен асыҡ күрһәтеп торалар.

Илебеҙҙә өлгәшелгән производство уңыштары хужалыҡта социалистик системаның капиталистик системаға ҡарағанда өҫтөн булыуы тураһында һәм социалистик ярыштың бөйөк көсө тураһында һөйләйҙәр.

Һуғыштан һуңғы осорҙа капиталистик илдәрҙең экономикаһы яңы экономик кризисҡа табан тәгәрәгән бер ваҡытта, анархиянан һәм кризистарҙан азат булған совет социалистик экономикаһы тайпылышһыҙ рәүештә алға бара.

Капитал хакимлек иткән донъяла хеҙмәтсәндәрҙең мохтажлығы һәм хәйерселеге үҫә бара. Эшселәрҙең реаль эш хаҡы һәм хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙең доходы һәр ваҡыт түбәнәйә, ә үҙ ҡулдарында бөтә государство власе аппаратын тотҡан монополияларҙың файҙалары бик күп үҫә.

Беҙҙең социализм илендә производствоның һәр бер яңы күтәрелеше менән бергә хеҙмәтсәндәрҙең материаль тормош кимәле лә күтәрелә. Эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡы үҫә, колхоз крәҫтиәнсеһенең доходтары күтәрелә.

Социализм төҙөү барышында совет кешеләренең аңы, уларҙың хеҙмәткә, социалистик милеккә, совет государствоһына мөнәсәбәттәре тамырынан үҙгәрҙе. Ленин — Сталин партияһы совет патриоттарының ғәйәт ҙур армияһын тәрбиәләне, ул патриоттар социалистик Тыуған ил бәхете өсөн еңһыҙғаныпм хеҙмәт итәләр. Совет кешеләренең юғары идея кимәле, яҡшы рухани йөҙө совет патриотизмының һуғыштан һуңғы күтәрелешендә үҙенең яҡты сағылышын таба.

Профессор Ф. Кошелев.

Черниковск машиналар төҙөү заводының начальниге иптәш Добрынин булған цех коллективе май алды ярышына ҡушылып, апрель айы планын 120 процентҡа үтәргә, төҙөлөш хаҡын 10 процентҡа түбәнәйтергә, бракты бөтәрергә йөкләмә алды һәм ошо уңай менән стахановсы вахтаға баҫты. Вахтаның тәүгә көндәрендә үк стахановсылар—балта оҫтаһы В. Буров, Б. Сәләхов, С. Крайнов, штукатурсы П. Важкина, бығыусы П. Евстигнеев иптәштәр икешәр-өсәр норма бирҙеләр.

Һүрәттә: балта оҫтаһы, стахановсы Б. Сәләхов эш өҫтөндә.

И. Ниғмәтуллин фотоһы.

Леспромхозда үҙэшмәкәр түңәрәге

Тюйно-Озер леспромхозы үҙэшмәкәр түңәрәге ойоштороп яҡшы инициатива күрһәтте. Түңәрәк менән леспромхоз секретаре иптәш Кевелева етәкселек итә.

Ағас әҙерләү сезонында түңәрәк 12 постановка һәм 8 концерт ҡуйҙы.

Түңәрәк 1 майға Островскийҙың «Ғәйепһеҙ ғәйеплеләр» тигән пьесаһын әҙерләй. Яҙғы сәсеү осоронда түңәрәк коллективе Аҫҡын районының яҡындағы колхоздарын хеҙмәтләндереүҙе күҙҙә тота.

—☆—

Донъя шахмат чемпионаты

Гроссмейстер Смыслов 16 апрелдә үҙенең үткән турҙа ауыр хәлдә кисектерелгән партияһын, уйнап тормай, Ботвинникка тапшырҙы. Был отош Ботвинниктең турнирҙа лидерлеген тағы ла нығытты.

* * *

Матч-турнирҙең 18 апрелдә уйналған 14-се туры ғәҙәттән тыш күп халҡ йыйҙы; уйынды күҙәтергә килеүселәр Союздар йортоноң колонналар залын ғына түгел, йәнәшә бүлмәләрен дә тултырҙылар. Шуның өҫтәүенә, Эйве—Смыслов, Ботвинник—Решевский партиялары бик киҫкен һәм ҡыҙыҡ уйналдылар.

Эйве—Смыслов партияһы Смыслов өсөн ауыр хәлдә кисектерелде. Эйве сифат өҫтәлгән һаҡлай.

Ботвинник—Решевский партияһында Немцович һаҡланыуы тип аталған уйын уйналды.

Ике яҡ та цейтнотҡа (уйнарға ваҡыт етешмәүгә) эләккәс, Ботвинник король менән яҡылыш йөрөш яһаны һәм шуның һөҙөмтәһендә уға материал юғалтыуҙар котолғоһоҙ булды. Решевскийҙең артыҡ фигураһы ҡалғас, Ботвинник үҙен еңелгән тип танырға мәжбүр булды. Был уның матч-турнирҙа беренсе еңелеүе.

14 турҙан һуң Ботвинниктең уң бергән 8, Керес, Решевскийҙең унҙан — 5,5, Смысловтың ун берҙән—5,5 очкоһы һәм бер кисектерелгән уйыны, Эйвенең ундан 1,5 һәм бер кисектерелгән уйыны бар.

* * *

19 апрелдә Смыслов кисектерелгән партияһын, уйнап тормайынса, Эйвегә тапшырҙы. Шулай итеп, голланд гроссмейстре турнир таблицаһына үҙенең беренсе еңеүен яҙҙы.

Кис Союздар йортоноң Октябрь залында Решевский менән Керестең 13-сө турҙан ҡалған партияһы уйналды. Был партия уйнап бөтөлмәне, Решевскийҙең артыҡ пешкаһы бар. Ләкин ике яҡтың да бөтә ауыр фигуралары, берәр слондары ҡалды. Был уйында әле ҡаты көрәш буласаҡ.

Матчта ҡатнашыусыларҙың хәле, 14 турҙан һуң, түбәндәгесә: турнирҙың лидере Ботвинниктең ун берҙән — 8 очкоһы, Керес менән Решевскийҙең ундан — 5,5 (һәм кисектерелгән бер партиялары), Смысловтың ун икенән—5,5, Эйвенең ун берҙән—2,5 очкоһы бар.

Беҙгә яҙалар

Тимер юл вокзалдарында таҙалыҡ, тәртип урынлаштырырға

Өфө бүлексәһе Куйбышев исемендәге тимер юлдың иң ҙур бүлексәләренән береһе булып иҫәпләнә. Бүлексәнең станциялары Башҡортостандың иң мөһим промышленность һәм ауыл хужалығы райондарына урынлашҡандар. Тимер юлдарҙағы вокзалдар менән меңдәрсә пассажирҙар файҙаланалар. Шулай ҙа был вокзалдарҙа пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү эштәре сиктән тыш насар ҡуйылған. Хатта республиканың башҡалаһы—Өфө вокзалын алғанда ла, ул пассажирҙарҙың үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереүҙән бик алыҫ тора әле. Унда культура, таҙалыҡ эштәре тейешенсә һаҡланмай, вокзал эсе бысраҡ була.

Йәки бына Стәрлетамаҡ вокзалын алығыҙ. Уны хатта вокзал тип әйтерлек тә түгел. Сөнки уның берҙән—ике яҡтағы ишеге лә тотош асыҡ торһа, икенсенән—бинаның эсе ҡарағыҙ, бысраҡ, һыуыҡ була, лозунг, плакаттар күрмәҫһегеҙ. Балалы әсәләр өсөн махсус бүлмә лә булдырылмаған. Ял итеү бүлмәһе, читальня залы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ. Вокзал бинаһындағы кеүек үк, буфетта лә бысраҡ, туҙан. Бина янындағы территория бөтөнләй сүп-сарға күмелгән.

Аҡкүл, Таҙҙар, Туймазы һәм башҡа станцияларҙың вокзалдарында ла ошондай уҡ күңелһеҙ хәлде күрергә мөмкин. Черниковск ҡалаһындағы предприятиеларҙың йөҙҙәрсә эшселәрен хеҙмәтләндереүсе Моторный разъезында платформалар төҙәк түгел, пассажирҙарға ҡар йәки ямғыр яуған ваҡыттарҙа ышыҡланып тороу урындары ла юҡ.

Бүздәк, Благовар, Черниковск, Ишембай станцияларының вокзалдары ла таҙа тотолмай. Был вокзалдарҙа ҡайнаған һыу булдырылмаған.

Был хәлдәр станция һәм вокзал начальниктәренең пассажирҙар тураһында кәрәгенсә хәстәрлек күрмәүҙәре тураһында һөйләйҙәр. Аҡкүл станцияһының начальниге Петров үҙенең төп эшенән ситләшеп, билет кассаһы кассиренә әүәрелгән. Ҡарлыман станцияһының начальниге Лукьянцев хатта йыш ҡына дежурствоһына иҫерек хәлдә сығыуҙа тиклем барып етә.

Пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙә йәшәп килгән был етешһеҙлектәр Өфө бүлексәһенең пассажирҙар бүлеге начальниге иптәш Хованов тарафынан станцияларҙың эше өҫтөнән оператив контроль булмауы арҡаһында килеп сыға.

Вокзалдарҙың, проводниктарҙың, билет кассаларының эшен күҙәтеп барыуға саҡырылған өлкән ревизор Кочетков күберәк әҫергә ярата. Шулай ҙа был кешегә һис бер сара күрелгәне юҡ.

Артабан бындай хәлдәргә һис юл ҡуйылырға тейеш түгел. Бөтәһенән дә элек вокзалдарҙағы штаттарҙы ҡайтанан ҡарарға, уларҙы бюрократтарҙан, ғәмһеҙ кешеләрҙән таҙартырға; пассажирҙарҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн станция һәм билет кассалары работниктәре һәм проводниктәр араһында социалистик ярышты йәйелдерергә кәрәк.

Өфө бүлексәһенең вокзалдары культуралы, таҙа һәм яҡшы йыһазландырылған булырға тейеш.

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһының коллектив хәбәрсеһе — «Большевистская путевка» газетаһы редакцияһы.

Газета витриналары тураһында

Совет халҡы ваҡытлы матбуғатты яратып уҡый. Газета һәм журналдарҙың һәр һанын халҡ көтөп ала. Һәм уның шулай булыуы бик тәбиғи. Сөнки газета Тыуған илебеҙҙең бөтә мөһим тормошон большевиктар партияһының һәм совет хөкүмәтенең тауышын, һүҙен еткерә, хеҙмәтсәндәрҙе Советтар Союзындағы һәм сит илдәрҙәге ваҡиғалар, хәлдәр менән таныштыра, уларға ваҡиғаларҙы дөрөҫ аңларға ярҙам итә.

Күп кенә партия, совет һәм профсоюз ойошмалары газеталы массаға еткереү өсөн төрлө саралар ҡулланалар. Витриналар ойоштороу — газеталарҙы массаға еткереүҙә бик ҙур роль уйнай. Шуға күрә халҡ күп йөрөй торған урындарҙа газета витриналары ойоштороп партия ойошмалары бик дөрөҫ һәм яҡшы эшләйҙәр. Дәүләкән районы Суйынсы ауыл Советындағы «Ҡыҙыл байраҡ» һәм Мәжит Ғафури исемендәге колхоздарҙың бөтә бригадаларында ла газета витриналары ойошторолған. Уларҙа һәр көнө үҙәк, өлкә һәм район газеталарының иң һуңғы номерҙарын уҡырға мөмкин һәм газета витриналары эргәһендә кеше булмаған ваҡыт юҡ.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, бигерәк тә ауылда, газеталарҙы массаға еткереү эшенә тейешле иғтибар бирелмәй әле, һәм уларҙан күберәк кешенең файҙаланыуы өсөн саралар күрелмәй. Газеталарҙан күбеһенсә ауылдың, колхоздың етәкселәре генә файҙалана, ә киң ҡатлам халҡ массалары еткерелмәй.

Газеталы массаға еткереү эшендә витриналар ҙур хеҙмәт итәсәк, бик күп кинтерергә мөмкин. Малаз, Учалы, Әбйәлил һәм башҡа районларҙағы колхоздарҙа газета витриналары бөтөнләй юҡ тип әйтерлек. Партия райкомдары һәм уларҙың пропаганда, агитация бүлектәре хатта был эш турында агитаторҙарҙың, тәүге партия ойошмалары секретарҙарының иғтибарын етерлек тартмайҙар. Мәҫәлән, 13 апрелдә Туймазы район үҙәгендә үткән тәүге партия ойошмалары секретарҙарының семинары булды, унда алда торған политик һәм хужалыҡ бурыстары айҡанлы массовый-политик эште йәйелдереү тураһында мәсьәлә тикшерелде. Ләкин унда ла халҡҡа газета, журналдарҙы еткереү, газета витриналары ойоштороу тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан кеше булманы.

Беҙҙең партиябыҙ газета аша үҙенә кәрәкле теләп көн һайын халҡ менән һөйләшә. Газета ауыл хужалығы алдындағы бурыстарҙы тәҡдим итә. Шуға күрә газеталарҙы киң ҡатлам массаға еткереүгә иң ҙур иғтибар бирелергә тейеш. Район үҙәктәрендә, бөтә колхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа халҡ күп йөрөй һәм йыйыла торған урындарҙа мөмкин тиклем күберәк газета витриналары ойошторорға кәрәк. Ул халҡ араһында массовый-политик эште көсәйтеүҙә иң яҡшы сара булып тора.

М. Волиева.

Ауылдарҙа телефон бәйләнешен яҡшыртырға

Район үҙәктәре менән үҙ зонаһына ингән ауылдар араһындағы телефон бәйләнеше бигерәк тә массовый тоҡ алған бәйләнеш средствоһы булып тора. Ауылда сәсеү, урожай йыйыу һәм дәүләткә иген тапшырыу кампанияларын уңыш менән үткәреүҙә телефон бәйләнешенең ҙур роле бар. [illegible] Улар урындағы ойошмаларҙы ауыл хужалығы эштәре менән оператив етәкселек итеүгә мөмкинлек бирергә тейешләр.

Республикабыҙҙа бөгөнгө көндә МТС-тарҙың 97, ауыл Советтарының 95, колхоздарҙың 70 проценты телефонлаштырылған. [illegible]

Хәҙер түбәнге телефон бәйләнешен [illegible]

1947 йылдың аҙағында колхоздар байтаҡ күләмдә телефон аппараттары, коммутаторҙар, кабелдәр алдылар. [illegible]

[illegible]

Районардағы яҡшы телефон бәйләнешен булдырыу, ул социалистик ауыл хужалығын күтәреүҙә колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтәсәк.

П. Алатордов.

Өфө ҡала-ара телефон станцияһы начальниге.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Кавам-Эс Салтаненең суд яуаплылығына тарттырылыуы

ТЕГЕРАН, 15 апрель. (ТАСС). Кавам-Эс-Салтане эше буйынса материалдарҙы Юстиция министре Сорури Мәжлескә тапшырҙы. Элекке премьер-министр тауарҙар сығарыуға һәм индереүгә лицензиялар биргән ваҡытта взятка алыуҙа ғәйепләнә. 14 мең тонна ярмыҡ, һәм 12 мең тонна дөгө сығарыуға булған лицензиялар өсөн Кавам-Эс-Салтаненең ағымдағы иҫәбенә 4 миллион риал яҙылған, ә 400 тонна сәй индереүгә бирелгән лицензиялар өсөн Кавам-Эс-Салтане 8.500 мең риал алған.

«Мардом» газетаһы был турала, юстиция министренең докладында Ирандың хакимлек итеүсе круглтарының бөтә яманлыҡтарының һәм взятка алыуҙарының хатта меңдән бер өлөшө лә юҡ, тип яҙа.

—☆—

Төркиәлә Англия менән Америка араһындағы ыҙғыштар

БУХАРЕСТ, 16 апрель. (ТАСС). «Универсул» һәм «Тимпул» газеталары «АҠШ Төркиәнән Англияның хәрби миссияларын сығарыуҙы талап итә» тигән баш аҫтында мәҡәлә баҫып сығарҙылар. Был мәҡәләлә былай тип әйтелә: «Үҙған йылдың март айы аҙағында АҠШ-тың Анкаралағы посолы Вильсон Төркиә сит ил эштәре министерствоһына барҙы. Бында Англияның Төркиәләге миссияларының эше тикшерелде. Улар Төркиә армияһын һайтанан ҡороуҙа американлылар өсөн ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙырғандар. Вильсон, Англияның Төркиәлә миссия тотоуҙарының кәрәклеге хәҙер юҡ инде, тип белдерҙе. Англияның хәрби миссияһын Төркиәнән сығарырға тырышып, американлылар Төркиә армияһындағы Англия яҡлы офицерҙарҙы, улар профессиональ әҙерлектең хәҙерге талаптарына яраҡлы түгелдәр инде, тигән һылтау аҫтында Төркиә армияһынан ситләтергә маташалар. Әле 1947 йылдың йәйендә үк Американың Төркиәләге беренсе хәрби миссияһының етәксеһе генерал Оливер Англия яҡлы ҡараштары менән билдәле булған 800 офицерҙы Төркиә армияһынан ситләтергә тәҡдим иткәйне. Был сараны тормошҡа ашырыу Төркиә армияһы юғары командованиеһының Англия яҡлы өлешенең ҡаршылығына осраны. Быға ҡарамаҫтан, американлылар Төркиә армияһынан 10 генералды һәм 270 өлкән офицерҙы ситләтеүгә өлгөшә алдылар. Хәҙер американлылар Төркиә армияһынан 300 офицерҙы ситләтеүҙе ныҡышмалы рәүештә талап итәләр, уларҙы хәҙерге ваҡытта АҠШ-та стажировка үткән кешеләр, йәки Төркиәнең һәр төрлө хәрби мәктәптәрендә американлылар тарафынан һуғыш эшенә өйрәтелгән офицерҙар менән алыштырырға тәҡдим итәләр».

—☆—

Гичевкә һәм уның менән бергә эшләүсе кешеләргә хөкөм ҡарары

СОФИЯ, 17 апрель. (ТАСС). Софияның өлкә судында заговорсы Гичевтең һәм уның менән бергә эшләүселәрҙең эше тыңланып бөттө.

Суд, Гичев хөкөм ителеүселәр Аргиров, Борисова, Лазов һәм Малковский ярҙамында ҡоралы йәшерен группалар төҙөгән һәм, улар алдына террористик актылар ойоштороу, илдә тынысһыҙлыҡтар һәм тәртипһеҙлектәр тыуҙырыу бурысын ҡуйған, тип билдәләне. Ошондай ҡоралы йәшерен группаларҙың хәрәкәттәре, Гичев уйы буйынса, эске эштәргә сит илдең тығылыуына һәм ватан фронтының халҡ власен бөтөрөүгә килтерергә тейеш булғандар. Бер үк ваҡытта Гичев Болгарияның ике йыллыҡ халҡ-хужалыҡ планын өҙөү маҡсаты менән үҙенең ярҙамсылары аша хөкүмәттең экономик сараларын саботаж ойошторған.

Халҡ власен яҡлау тураһындағы закон нигеҙендә суд Димитр Гичевте бөтә хоҡуҡтарынан мәхрүм итеп ғүмерлеккә төрмәгә ябырға һәм 500 мең лев күләмендә штраф түләтергә хөкөм итте. Хөкөм ителеүселәрҙең башҡалары 2 йылдан алып 10 йылға тиклем төрмәгә ябырға хөкөм ителделәр.

—☆—

Америка крейсерҙәренең Франция порттарына килеүе

ПАРИЖ, 18 апрель. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, кисә Американың ауыр крейсеры «Рочестер» Виллфраншҡа килгән. Был крейсерҙа вице-адмирал Шерман да бар. Енел крейсерҙар «Манчестер» һәм «Дайтон» Жуан боғазында (Приморье Альптары департаменте) туҡтағандар.

Чехословакияның коммунистик һәм социал-демократик партияларың берләштереү тураһында ҡарар

ПРАГА, 18 апрель. (ТАСС). Чехословакия компартияһы Үҙәк Комитетенең пленумы һәм Чехословакия социал-демократик партияһының башҡарма комитеты компартияһы социал-демократтар партияһы менән ҡушыу тураһында бөгөн бергәләп белдереү иғлан иттеләр.

Февраль ваҡиғалары көндәрендә, тип әйтелә коммюникелә, беҙҙең илебеҙҙең ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең берҙәмлегенең көсөнә ышандылар, был берҙәмлек республиканы реакция көстәренең серьез ҡурҡыныслыҡтан ҡотҡарып алып ҡалды. Шуға күрә февраль ваҡиғаларынан һуң хеҙмәтсәндәрҙең берҙәмлеккә ынтылыштары бик тәбиғи булып тора. Эшселәр синыфы араһында берҙәмлеккә булған ынтылыш бигерәк тә көслө булып тора. Был ынтылыш эшселәр синыфының политик һәм ойоштороу яҡтан тулыһынса берләшкән булыуы тураһындағы мәсьәләне килтереп тыуҙырҙы. Ошо дөйөм ынтылышты яҡлап, Чехословакия компартияһының һәм Чехословакия социал-демократик партияһының вәкилдәре кәңәшмәгә йыйылдылар һәм ике партияны ла берләштереү кәрәклеге тураһында ҡарарға килделәр. Ике партия члендарының да теләктәрен үтәү өсөн, мөмкин тиклем тиҙерәк ваҡыт эсендә берләштереү үткәреләсәк. Берләштереү һайлау кампанияһы тамамланғандан һуң тантаналы рәүештә тормошҡа ашырыласаҡ.

Берләштереүҙе әҙерләү өсөн берләштереү буйынса үҙәк комитет төҙеләсәк, ул 6 члендан — һәр бер партиянан өсәр вәкилдән торасаҡ. Өлкәләрҙә, округтарҙа, ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа шундай уҡ комитеттар төҙөлә. Үҙәк берләшкән комитет партияларҙы берләштереүҙе әҙерләү тураһында тейешле директивалар сығарасаҡ.

Маркс — Энгельс—Ленин —Сталин учениеһе партияның дөйөм идеялы базаһы буласаҡ. Был учение, тарихи тәжрибә һәм, барыһынан элек, бөтә донъя һуғышы тәжрибәһе [illegible] ғанса, социализмдең еңеүсән [illegible] булып тора. Чехословакияның [illegible] тияһы алынған тәжрибәһе [illegible] һәм практик тәртиптәге сәбәптәр буйынса берләшеүҙең нигеҙе булып тора.

Берләшеүгә күсеп, беҙҙең партиябыҙ тарихи аҙым яһайҙар, был аҙым Чехословакияла эшселәрҙең социалистик хәрәкәтенең яңы дәүеренә башланыс һала. Эшселәр хәрәкәтенең таркалыуы капитализмға кәрәк ине. Беҙҙең аңлы рәүештә социализмға барыубыҙ эшселәр синыфын политик һәм ойоштороу яғынан берләштереү кәрәклеген тыуҙыра. Шуның менән эшселәр синыфы үҙенең тарихи бурысын үтәй алһын өсөн көслө нигеҙҙәр тыуа. Беҙ шуның менән 1920 йылдан башлап йәшәп килгән фекер айырымлыҡтарын бөтәрәбеҙ. Беҙ, бынан 70 йыл элек Чехословакияла социал-демократтар съезында социализмды башлап ебәреүселәр ниндәй рухта [illegible] ғыш яһаған булһалар, шундай уҡ рухта берҙәмлекте аяҡҡа баҫтырасаҡбыҙ.

Беҙҙең берҙәмлегебеҙ ҡайтанан тергеҙелгән милли фронтты ныҡытасаҡ, халҡ-демократик ҡоролоштоң нығыныуына һәм социализмдең тыныс, йылдам үҫеүенә, Чехословакия халҡының бәхетле һәм шатлыҡлы тормошона гарантия буласаҡ, быныһы өсөн [illegible] күп быуындарҙың иң яҡшы кешеләре ғазап сиктеләр һәм үлделәр.

Чехословакияның закондар сығарыусы милли собраниеһендә

ПРАГА, 18 апрель. (ТАСС). Закондар сығарыусы милли собрание 1948 йылдың 30 майына билдәләнгән милли собраниеға һайлауҙар тураһындағы яңы законды бер тауыштан ҡабул итте. Республика граждандарына киң демократик хоҡуҡтар биреүсе яңы закон дөйөм, тура һәм йәшерен тауыш биреү юлы менән 6 йыл срокка һайлана торған 300 депутат составында бер палаталы парламентҡа — милли собраниеға һайлауҙы күҙҙә тота. 18 йәше тулған бөтә граждандар, шул иҫәптән хәрби хеҙмәткәрҙәр һәм милли имшелек корпусы хеҙмәткәрҙәре һайлау хоҡуғы менән файҙаланалар; 21 йәштән өлкән кешеләр һайлана алалар.

Закон халҡ алдында республика һәм халҡ-демократик ҡоролошо алдында үҙҙәрен яман яҡтарынан күрһәткән кешеләрҙе һайлау хоҡуғынан мәхрүм итеүҙе күҙҙә тота. Күп кешене эсенә алмаған был категорияға, башлыса, февраль ваҡиғаларынан һуң милли фронттың хәрәкәт комитеты тарафынан илдең общественный һәм политик тормошонда ҡатнашыуҙан мәхрүм ителгән кешеләр инә. Хеҙмәтсәндәрҙең политик партиялары һәм общественный ойошмалары ғына түгел, бәлки башҡа исемлеккә аҫтына кәмендә 1000 һайлаусының ҡултамғаһын йыйнаған һәр бер кеше кандидат исемлектәрен күрһәтә ала.

Италияла һайлауҙар

РИМ, 18 апрель. (ТАСС). Бөгөн иртәнге сәғәт 8-ҙә бөтә Италияла Италия республикаһының депутаттар палатаһына һәм сенатына һайлауҙар башланды. 21 йәшкә еткән бөтә граждандар — 29.098.035 кеше палатаға һайлауҙарҙа ҡатнашыу хоҡуғына эйәләр. 25 йәшкә еткән граждандар бер үк ваҡытта сенатҡа һайлауҙарҙа ла ҡатнашалар. Илдең 41.647 һайлау участкаһында тауыш биреү 19 апрелдә 14 сәғәттә тамамланасаҡ. Тауыш биреү тураһында тәүгә өлешләтә йомғаҡ 20 апрелгә ҡаршы төндә көтелә. Ә һуңғы мәғлүмәттәр 22 апрелгә ҡаршы төндән дә иртәрәк инмәйәсәк.

Иртәнән башлап һайлау участкалары алдына һайлаусылар нәүбәте теҙелде. Илдә тыныслыҡ хөкөм һөрә, бер ниндәй ҙә ваҡиғалар юҡ.

* * *

РИМ, 19 апрель. (ТАСС). Иғлан ителгән официаль мәғлүмәттәргә ҡарағанда, тауыш биреүҙең беренсе көнөндә һайлаусыларҙың урналарға килеүҙәре Төньяҡ Италияла 82,5 процентҡа, Үҙәк Италияла 81,5, Көньяҡ Италияла — 74 процентҡа еткән. Бөтә илдә һайлаусыларҙың һайлау участкаларына килеүенең уртаса проценты тауыш биреүҙең беренсе көнөндә, ошо мәғлүмәттәр буйынса 80 процентҡа еткән.

Бөгөн 14 сәғәттә илдең бөтә участкаларында ла тауыш биреү туҡтатылған. Һайлаусыларҙың тауыш биреүҙә ҡатнашыуҙары тураһында иң һуңғы мәғлүмәттәр алынмаған әле.

«Католик хәрәкәт» һәм христиан демократик партия активистары үҙҙәре яҡлы кешеләрҙең урналарға килеүҙәрен арттырыу өсөн уларға бушҡа транспорт бирел, йогошло ауырыу менән ауырыусыларҙы һәм башҡа кешеләрҙе тауыш бирергә мәжбүр иткәндәр.

Газетала һайлау участкаларының кабиналарында ҡаты ауырыусыларҙың бер нисә үлем ваҡиғаһын билдәләйҙәр. Руханиҙар һәм монахтар ике йәки өс ялған йәки һатып алынған һайлау свидетельстволары нигеҙендә бер нисә тапҡыр тауыш биреүҙе киң ҡулланғандар.

Кисә Римда католик ойошмалар айырым йорттарға телефон аша 100 мең-дән артыҡ саҡырыу яһағандар һәм һайлаусыларҙы, әгәр ҙә улар урналарға килмәһәләр, язалар менән ҡурҡытҡандар.

* * *

РИМ, 19 апрель. (ТАСС). 19 апрелдә 14 сәғәттән алып, Италияның бөтә һайлау участкаларында бирелгән тауыштарҙы иҫәпкә алыу башланды. Беренсе нәүбәттә сенатҡа һайлауҙар өсөн бирелгән тауыштар иҫәпләнә. Шунан һуң депутаттар палатаһына һайлауҙар буйынса тауыштар иҫәпләнәсәк.

Учредительный собрание председателе Террачини инициативаһы буйынса, бөтә парламент партияларының вәкилдәре, тауыштарҙы иҫәпкә алыу ваҡытында төп исемлектәр вәкилдәре иң һуңғы мәғлүмәттәрҙе иғлан итеү органы менән даими рәүештә бәйләнештә тора алһындар өсөн, уларҙы эске эштәр министерствоһына индерергә тәҡдим иткән, министрға мөрәжәғәт иттеләр. Министр Шельба был тәҡдимде кире ҡаҡты.

Халҡ демократик фронты башҡарма комитеты, эске эштәр министре тауыш биреүҙе тиҙләтеү өсөн кисә һайлау комиссияларының председателдәренә төнөндә лә сенатҡа һәм депутаттар палатаһына һайлауҙар өсөн бер үк ваҡытта бюллетендәр тапшырырға тәҡдим иткәне өсөн эске эштәр министрына протест белдерҙе. Был тәҡдим айырым тауыш биреүҙе талап итеүсе законды боҙоу булып тора.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00716. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29 сы-йыл сыға

1948 йыл № 81 23 апрель йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Совет Социалистик Республикалар Союзы Министрҙәр Советы Председателе Генералиссимус Сталинға Ю. Циранкевичтан котлау телеграммаһы. (1-се бит).

Польша Республикаһы Министрҙәр Советы Председателе Ю. Циранкевичҡа И. Сталиндән котлау телеграммаһы. (1-се бит).

ССР Союзы Министрҙәр Советында. 1947 йылда искусство өлкәһендә күренекле хеҙмәттәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһында. (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Ефимов. — Коммунистар үҙҙәренең политик белемдәрен күтәрәләр. (2-се бит).

И. Захаров. — Колхоз правлениеларенең хужалыҡ етәкселеген яҡшыртырға. (2-се бит).

Тәүге мөмкинлектәр менән баҫыу эштәрен йәйелдерергә! (2-се бит).

Торлаҡ төҙөлөшө эштәрендә — большевистик темп! С. Бикбов.—Партия эшенең мөһим участкыһы. А. Гашев. — Производство ҡеүәттәрен тулы файҙаланырға. Н. И. Крюков. — Сифат өсөн көрәш — иғтибар үҙәгендә. (3-сө бит).

Беҙҙең республикала. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Торлаҡ төҙөлөшә—государство әһәмиәтендәге мөһим бурыс

Хеҙмәтсәндәр тураһында хәстәрлек беҙҙең партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең үҙәк бурыстарынан береһе булып килде һәм булып килә. Торлаҡ, көн-күреш һәм культура бинаһары төҙөлөшенә ебәрелгән средстволарҙың йылдан-йыл арта барыуында был хәстәрлек ышандырырлыҡ рәүештә күҙәләнә. Быны беҙҙең Башҡортостан миҫалында ғына ла асыҡ күрергә мөмкин.

Һуғыштан һуңғы ике йылда республикабыҙҙа дөйөм майҙаны 132 мең квадрат метрҙан артығыраҡ булған яңы торлаҡ йорттары төҙөлөп, эксплоатацияға бирелде. Торлаҡ төҙөлөшә бигерәк тә үткән йыл киң ҡолас алды. Төҙөлөп эксплоатацияға бирелгән 50 мең квадрат метр торлаҡтан тыш, дөйөм майҙаны 32 мең квадрат метр булған меңгә яҡын индивидуаль йорт һалынды.

Государство тарафынан ебәрелгән средстволар тулыһынса файҙаланылһа, планда билдәләнгән сараларҙы эш-эҙ үтәлһә ҡалаларҙың, эшсе поселкаларҙың хеҙмәтсәндәре фактик эксплоатацияға бирелгәнгә ҡарағанда икеләтә артығыраҡ торлаҡ майҙаны алған булыр инеләр. Үкенескә ҡаршы, яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында республикалағы бер генә төҙөлөш ойошмаһы ла, шулай уҡ хужалыҡ юлы менән төҙөлөш эштәре алып барырға тейеш булған промышленность предприятиелары ла торлаҡ төҙөлөшө планын үтәмәнеләр. Һөҙөмтәлә торлаҡ төҙөлөшөнөң темпы көндән талаптарынан, промышленностен үҫеше ихтыяжынан ныҡ артта ҡалды. Бына шуның өсөн дә Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы республикала төҙөлөш эштәренең темпы бик түбән булыуын, ә торлаҡ төҙөлөшөнөң юл ҡуйғыһыҙ артта ҡалыуын иң серьез етешһеҙлектәрҙең береһе булып тора тип күрһәтте һәм төҙөлөш ойошмаларына партия етәкселеген көсәйтеп, был бик мөһим тармаҡта ҡырҡа һынылыш яһауҙы талап итте.

Ләкин төҙөлөш ойошмаларының, промышленность предприятиеларының етәкселәре конференцияның был иҫкәртеүҙәренән тейешле һығымта яһамағандар әле. Ағымдағы йылға билдәләнгән торлаҡ төҙөлөшө планының беренсе кварталда ундай бер өлөшө генә үтәлеүе, төҙөлөш эштәренең иң ҡыҙыу сезонына әҙерлектең насар булыуы шул турала һөйләй.

Октябрьск ҡалаһын төҙөүҙә, нефтселәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙә бик мөһим бурыс йөкмәтелгән Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһе беренсе кварталда бер генә торлаҡ йортон да эксплоатацияға тапшырманы. Сөнки управляющий Бурдаков, баш инженер Лубанный иптәштәр үҙ иғтибарын һылтанып, һаман да был мөһим эште баһаламай киләләр. Имеш, уларҙы техник документация, кирбес... менән тәьмин итмәйҙәр. Уның һыҙ һылтаныуҙар ширмаһына йәшеренмәҫкә, ә техник документация менән тәьмин ителгән объекттарҙа төҙөлөш эшен киң йәйелдерергә, булған механизмдарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланырға кәрәк.

Черниковск төҙөлөш тресы үткән йыл торлаҡ төҙөлөшө планын эшҙә, төҙөгән йорттарын да ике миллион һум зарар менән башҡарҙы, ә ағымдағы йылдың беренсе кварталында пландың өстән бер өлөшө самаһын ғына үтәне. Управляющий иптәш Рудаков транспорт, гипс, кирбес, ағас материалдары етешмәүгә һылтана. Тресттың булған транспорты, төҙөү материалдарын етештерә торған предприятиелары тулы ҡеүәтендә файҙаланылмаған бер ваҡытта, бындай һылтаныуҙың зарарлы икәнлеге асыҡ булһа кәрәк. Үҙҙәрендә ике кирбес заводы, ҡеүәтле карьер хужалығы, башҡа ярҙамсы предприятиелары булған «Стәрлетамакстрой» тресы етәкселәре лә төҙөлөш материалдары етешмәү тураһында зарланалар. Был етәкселәр төрлө сәбәптәр табып, үҙҙәренең инициативаһыҙлыҡтарын, эште ойоштора белмәгәнлектәрен ҡаплап ҡалырға тырышалар.

Өфө ҡалаһындағы кабель, электрооборудование, резина, «Металлошланг», телефон аппараты заводтары, текстиль комбинат хужалыҡ юлы менән күп кенә торлаҡ йорттары төҙөргә тейеш инеләр. Ләкин был предприятиеларҙың етәкселәре был өлкәлә күҙгә күренерлек бер нәмә лә эшләгәндәре юҡ. Стәрлетамаҡтағы машиналар төҙөү заводы етәкселәренең ғәмһеҙлеге арҡаһында беренсе кварталда торлаҡ төҙөү өсөн билдәләнгән 500 мең һум аҡса бөтөнләй файҙаланылмай ҡалды. Был предприятиеларҙың етәкселәре улар өсөн кемдәрҙер торлаҡ төҙөп биреүен көтәләр, күрәһең.

Эштең мөһимлеген баһалаған етәкселәр бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңәләр, торлаҡ төҙөү, төҙөлөш материалдары етештереү пландарын арттырып үтәйҙәр. Управляющие иптәш Башилов булған төҙөлөш тресы беренсе кварталда торлаҡ төҙөлөшө планын 121 процентҡа үтәне. Төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһенең предприятиелары, управляющие иптәш Стариков булған төҙөлөш тресы беренсе кварталда тәүге уңыштарға өлгәштеләр. Был фактылар артта ҡалыусыларҙың һәр төрлө һылтаныуҙарын тулыһынса кире ҡағалар.

Торлаҡ төҙөлөшө — государство әһәмиәтендәге мөһим бурыс. Быйыл төҙөлөш эштәренең күләме бер нисә тапҡырға артыуы, уны большевистик темп менән алып барыуҙы талап итә. Көстә беренсе нәүбәттә үткән йылдан күскән төҙөлөштәрҙе тамамлауға тупларға кәрәк. Һәр бер төҙөлөш ойошмаһының, промышленность предприятиеһенең етәксеһе планда ҡаралғандан тыш, тағы ла ҡайҙандыр төҙөлөш материалдары биреләүен көтмәҫкә, ә уларҙы үҙендә етештереү, табыу һәм тиҙ, сифатлы, арзан итеп төҙөү, торлаҡ төҙөлөшө эшен артта ҡалып килеүҙән сығарыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейеш. Подрядчиктәр менән заказчиктар араһында берҙәм эште тәьмин иткәндә, большевистик инициатива, ныҡышмалыҡ күрһәткәндә быға өлгәшеп була.

Партияның ҡала һәм район комитеттәре, быға саҡлы булған кеүек, ситтән торон күҙәтеүсе ролендә генә ҡалмаҫҡа, ә өлкә конференцияһы талап иткәнсә төҙөлөш ойошмаларының эшенә ҡаты контроль, конкрет етәкселек, эшлекле ярҙамлы тәьмин итергә тейештәр. Тәүге партия ойошмаларының бөтә ойоштороусанлыҡ һәләтлеген, политик-тәрбиә эшен төҙөлөштең конкрет участкаларына күсереп, торлаҡ төҙөлөшө планын срогынан алда үтәү өсөн эшселәр араһында массовый социалистик ярыш ойошторорға кәрәк.

СОВЕТ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАЛАР СОЮЗЫ МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ ГЕНЕРАЛИССИМУС СТАЛИН ӘФӘНДЕГӘ

Мәскәү.

Беҙҙең илдәребеҙ араһында дуҫлыҡ һәм ярҙам тураһындағы пактҡа ҡул ҡуйыуҙың өс йыллығында мин үҙ исемемдән һәм Польша Республикаһы Хөкүмәте исеменән Советтар Союзы халҡтарына һәм һеҙҙең үҙегеҙгә, Премьер әфәнде, ысын күңелдән котлауҙар ебәрәм.

Ныҡлы тыныслыҡ, шулай уҡ дөйөм имиселек өсөн беҙҙең илдәребеҙ араһындағы союздың артабан нығыуына ҡарата иң яҡшы теләктәремде ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

ЮЗЕФ ЦИРАНКЕВИЧ.

ПОЛЬША РЕСПУБЛИКАҺЫ МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ Ю. ЦИРАНКЕВИЧ ӘФӘНДЕГӘ

Дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет-Польша договорына ҡул ҡуйыуҙың өс йыллығы көнөндә Польша халҡына, Польша хөкүмәтенә һәм һеҙҙең үҙегеҙгә, Премьер-Министр әфәнде, дуҫтарса котлауҙарымды ебәрәм.

Беҙҙең илдәребеҙ араһындағы союздың артабан нығыуын, һәм Польша Халыҡ Республикаһының тайпылышһыҙ рәүештә үҫеүен теләйем.

И. СТАЛИН.

ССР Союзы Министрҙәр Советендә

1947 йылда искусство өлкәһендә күренекле хеҙмәттәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

ССР Союзы Министрҙәр Советы 1947 йылда түбәндәге өлкәләрҙә күренекле хеҙмәттәр өсөн Сталин премиялары бирергә ҡарар итте:

А. Музыка өлкәһендә

I. Ҙур музыкаль-сәхнә һәм вокаль әҫәрҙәр (опера, балет, оратория, кантата)

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

Иосиф Антонович Таллат-Келпшаға, Литва ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле — «Сталин тураһында кантата» өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Евгений Григорьевич Брусиловскийға, Ҡаҙаҡ ССР-ның халыҡ артисы — «Совет Ҡаҙаҡстаны» исемле кантата өсөн.

2. Нәзиб Ғаяз улы Жиһановҡа, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле — «Алтын сәс» операһы өсөн.

II. Ҙур инструменталь әҫәрҙәр

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

Рейнгольд Морицевич Глиэргә, СССР-ҙың халыҡ артисы — № 4 квартет өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

Ҡара Әбүлфәз улы Ҡараевҡа «Лайло һәм Мәжнүн» исемле симфоник поэма өсөн.

III. Бәләкәй формалағы әҫәрҙәр

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Борис Андреевич Мокроусовҡа — «Изге таш», «Тыуған ер тураһында», «Яҡты гармонь», «Яҙ көнө баҡсала сәскәләр ҙә яҡышлар» тигән йырҙары өсөн.

2. Анатолий Григорьевич Новиковҡа, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле — «Донъя демократик йәштәренең гимны» тигән массовый йыр өсөн.

IV. Концерт-башҡарыу эшмәкәрлеге өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Александр Федорович Гедикеға, РСФСР-ҙың халыҡ артисы, профессор, органсыға.

2. Григорий Гурьевич Верёвкаға, Украин ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле, профессорға, дирижерға.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Михаил Давыдович Александровичҡа, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисына, йырсыға.

2. Күләш Байсеитоваға, СССР-ҙың халыҡ артисткаһына, йырсыға.

Б. Живопись өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Владимир Александрович Серовҡа — «В. И. Ленин Совет власын иғлан итә» тигән картина өсөн.

2. Александр Иванович Лактионовҡа — «Фронттан хат» картинаһы өсөн.

3. Ираклий Моисеевич Тоидзеға — «Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 24 йыллығына арналған тантаналы ултырышта И. В. Сталиндең сығышы» картинаһы һәм И. В. Сталин портреты өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Михаил Иванович Хмелькоға — «Бөйөк рус халҡы өсөн!» тигән картина өсөн.

2. Александр Павлович Бубновҡа — «Куликов яланында иртә» картинаһы өсөн.

3. Яков Дорофеевич Ромасҡа — «Баҙла» картинаһы өсөн.

4. Анатолий Никифорович Яр-Кравченкоға — М. Горький Сталин, Молотов һәм Ворошиловҡа «Ҡыҙ һәм үлем» тигән әҫәрен уҡыған ваҡыттағы картинаһы өсөн һәм М. Горький, Д. Бедный, Джамбул, И. Барбарус (Варес), С. Нерис портреттары өсөн.

5. Петр Иванович Котовҡа, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле — академик Н. Д. Зелинский портреты өсөн.

25.000 һум күләмдә **ӨСӨНСӨ** дәрәжәләге премиялар:

1. Евгений Адольфович Кибрикҡа — «Ундай партия бар!», «Ленин Разливта» тигән һүрәттәр өсөн.

2. Виктор Григорьевич Пузырьковҡа — «Ҡара диңгеҙселәр» картинаһы өсөн.

3. Георгий Степанович Мелиховҡа — «Йәш Тарас Шевченко художник К. П. Брюлловта» картинаһы өсөн.

4. Василий Прокофьевич Ефановҡа — В. М. Молотов портреты өсөн.

5. Николай Павлович Ульяновҡа, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле — К. С. Станиславский портреты өсөн.

6. Виктор Михайлович Орешниковҡа — «В. И. Ленин университеттә экзаменда» картинаһы өсөн.

В. Скульптура өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Николай Васильевич Томскийға, РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле — армия генералы И. Д. Черняховскийҙың скульптур портреты өсөн.

2. Яков Иванович Николадзеға — «В. И. Ленин «Искра»ны ойоштороу эпохаһында» тигән скульптураһы өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Заир Исаакович Азгурға, Белорус ССР-ның халыҡ художнигы — Ф. Э. Дзержинскийҙың скульптур портреты өсөн.

2. Евгений Викторович Вучетичҡа — гвардия генерал-полковнигы В. И. Чуйковтың скульптур портреты өсөн.

3. Зиновий Моисеевич Виленскийға — П. И. Чайковскийҙың скульптур портреты өсөн.

Г. Архитектура өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

Ташкент ҡалаһындағы Государство академик опера һәм балет театры бинаһы архитектураһы өсөн: Алексей Викторович **Щусевҡа**, академикка, авторға; халыҡ мастерҙәре: Үзбәк ССР-ы фәндәр Академияһының почетлы академиге Усташирин **Мураҙовҡа**; Үзбәк ССР-ы халыҡ художнигы Ташпулат **Асланҡуловҡа**; художниктарға — Усто Кули **Жәмиловҡа**, Абдулла **Балтаевҡа**; Чингиз **Ахмаровҡа**; Балта **Жураевҡа**; Жамал **Жураевҡа**.

Д. Театр-драма искусствоһы өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

РСФСР-ҙың халыҡ артисе, постановщик Константин Александрович **Зубовҡа**; РСФСР-ҙың халыҡ артисе, постановщик Николай Васильевич **Петровҡа**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Николай Александрович **Анненковҡа**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Федор Васильевич **Григорьевҡа**; РСФСР-ҙың халыҡ артисткаһы Елена Николаевна **Гоголеваға**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Елена Митрофановна **Шатроваға**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Владимир Александрович **Владиславскийға**; СССР-ҙың халыҡ артисе Евдокия Дмитриевна **Турчаниноваға** — Государство академик бәләкәй театрында ҡуйылған «Бөйөк көс» тигән спектакль өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Латыш ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле, постановщик Вера Михайловна **Балюнасҡа**; артист Рихард Кришьянович **Зандерсонға**; Латыш ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле Альфред Фрицевич **Амтман-Бриедитҡа**; Латыш ССР-ның атҡаҙанған артисткаһы Лиҙа Александровна **Фрейманға** (Эрикҡә); артист Карп Павлович **Клетниекҡә**; Латыш ССР-ның халыҡ артисткаһы Берта Фрицевна **Румниецҡа**; артистка Белта Мартыновна **Лиепа**; Латыш ССР-ның атҡаҙанған культура деятеле, драматург Арвид Петрович **Григулисҡа** — Латыш ССР-ы драма театрында ҡуйылған «Балсыҡ һәм фарфор» спектакле өсөн.

2. Постановщик Константин Николаевич **Санниковҡа**; Белорус ССР-ның халыҡ артисе Глеб Павлович **Глебов-Сорокинға**; Белорус ССР-ның халыҡ артисе Борис Викторович **Платоновҡа**; Белорус ССР-ның халыҡ артисткаһы Ирина Флориановна **Жданович-Платоноваға** — Я. Купала исемендәге Минск драма театрында ҡуйылған «Константин Заслонов» спектакле өсөн.

3. СССР-ҙың халыҡ артисе, постановщик Марьян Михайлович **Крушельницкийға**; Украин ССР-ның халыҡ артисе, постановщик Леонтий Федорович **Дубовикҡә**; Украин ССР-ның халыҡ артисе Александр Иванович **Сердюкҡә**; Украин ССР-ның халыҡ артисе Даниил Исидорович **Антонович-Будькоға**; Украин ССР-ның халыҡ артисе Федор Иванович **Радчукҡа**; художник Василий Николаевич **Греченкоға** — Т. Шевченко исемендәге Харьков Украин драма театрында ҡуйылған «Генерал Ватутин» спектакле өсөн.

4. Азербайжан ССР-ның халыҡ артисе, постановщик Адиль Рза улы **Искендаровҡа**; Азербайжан ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле, художник Нусрат Мовсум улы **Фатуллаевҡа**; Азербайжан ССР-ның халыҡ артисе Жафар Заде **Афғанлыға**; Азербайжан ССР-ның халыҡ артисткаһы Мәрзиә Йософ ҡыҙы **Давудоваға**; Азербайжан ССР-ның халыҡ артисе Мирза Аға Али улы **Алиевҡа**; Азербайжан ССР-ның халыҡ артисе Сидги Рухулла **Ахундовҡа**; Азербайжан ССР-ның атҡаҙанған артисе Дағестанлы Исмаил **Гаджиевҡа**; Азербайжан ССР-ның халыҡ артисе Кязим Зия **Кязим-Задеға** — Азизбеков исемендәге Азербайжан Государство драма театрында ҡуйылған «Көнсығыш иртәһе» спектакле өсөн.

Е. Опера искусствоһы өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премия:

Белорус ССР-ның атҡаҙанған артисе, постановщик Борис Александрович **Покровскийға**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған искусство деятеле, художник Владимир Владимирович **Дмитриевҡа**; дирижер Кирилл Петрович **Кондрашинға**; РСФСР-ҙың халыҡ артисе Алексей Петрович **Ивановҡа**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Николай Федорович **Щегольковҡа**; артистка Вера Ивановна **Борисенкоға** — СССР Государство академик Ҙур театрҙа ҡуйылған «Дошман көсө» спектакле өсөн.

Ж. Балет искусствоһы өлкәһендә

100.000 һум күләмдә **БЕРЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

Грузия ССР-ның халыҡ артисе, постановщик Вахтанг Михайлович **Чабукианиға**; Грузия ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле, дирижер Григорий Варфоломеевич **Киладзеға**; артист Зураб Малакиевич **Кикалейшвилиға**; Грузия ССР-ның атҡаҙанған искусство деятеле, художник Сергей Соломонович **Кобуладзеға** — З. Палиашвили исемендәге Грузия опера һәм балет театрында ҡуйылған «Синатле» спектакле өсөн.

50.000 һум күләмдә **ИКЕНСЕ** дәрәжәләге премиялар:

1. Композитор Михаил Иванович **Чулакиға**; постановщик Борис Александрович **Фенстерға**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе Николай Александрович **Зубковскийға**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Галина Николаевна **Кирилловаға**; артисткалар: Галина Ивановна **Исаеваға**, Валентина Максимовна **Розенбергҡа** — Ленинградтың бәләкәй опера театрында ҡуйылған «Ялған кейәү» спектакле өсөн.

2. Композитор Игорь Владимирович **Морозовҡа**; постановщик Михаил Федорович **Моисеевҡа**; РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисе, дирижер Исидор Аркадьевич **Закҡа**; художник Борис Григорьевич **Кноблокҡа**; артистка Ариадна Александровна **Беловаға** — Новосибирск опера һәм балет театрында ҡуйылған «Доктор Айболит» спектакле өсөн.

СОВЕТ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАЛАР СОЮЗЫНЫҢ ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫ ПРЕДСЕДАТЕЛЕ Н. М. ШВЕРНИК ӘФӘНДЕГӘ

Мәскәү.

Польша Республикаһы менән Советтар Союзы араһындағы дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам Договорына ҡул ҡуйылуға өс йыл тулыу айҡанлы, СССР халыҡтарына һәм һеҙҙең үҙегеҙгә Польша халҡы исеменән һәм үҙ исемемдән бик ныҡ ҡайнар котлау ебәрәм.

Беҙҙең государстволарыбыҙ союзы һәм беҙҙең халыҡтарыбыҙ дуҫлығы уларҙың имен үҫешенә һәм бөхетле киләсәгенә артабан ныҡлы гарантия булаһын.

Болеслав Берут.

ПОЛЬША РЕСПУБЛИКАҺЫ ПРЕЗИДЕНТЕ Б. БЕРУТ ӘФӘНДЕГӘ

Варшава.

Президент әфәнде, Беҙҙең Советтар Союзы менән Польша Республикаһы араһындағы дуҫлыҡ, үҙ-ара ярҙам һәм һуғыштан һуңғы хеҙмәттәшлек тураһындағы Договорға ҡул ҡуйылуға өс йыл тулыу айҡанлы миңә котлауҙарығыҙ өсөн рәхмәтемде, шулай уҡ яңы демократик Польша халҡына тәрәҡҡиәт, беҙҙең халыҡтарыбыҙ араһындағы союз һәм дуҫлыҡтың артабан нығыуы өсөн артабан уңыштар теләүемде ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Н. Шверник.

Партия тормошо

Коммунистәр үҙҙәренең политик белемдәрен күтәрәләр

Большевизм теорияһын һәм тарихен үҙ алдыңа өйрәнеүҙең иң яҡшы метод булып торғанлығы күп йыллыҡ тәжрибә менән дөрөҫләнде һәм ул практикала үҙен аҡланы. Шуны иҫәпкә алып, ВКП(б)-ның Молотов район комитеты 1947 йылда үҙ алдына уҡыусылар өсөн даими эшләүсе ике лекторий ойоштороҙо. Быларҙың береһе «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеүҙе тамамлап, партия тарихен тәүге сығанаҡтарҙан өйрәнеүселәр өсөн, икенсеһе — китап менән үҙ алдына эшләү күнекмәләре булмаған коммунистәр өсөн ине. Был лекторийҙарға 300-ҙән артыҡ кеше йәлеп ителде. Программала диалектик һәм тарихи материализм, Сталинсе Конституция, социализмдан аҡрынлап коммунизмға күсеү, Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы тураһында һәм башҡа темалар индерелде. Ошо көнгә ике лекторийҙа ла 25-әр лекция үткәрелде. Лекциялар партия тарихен үҙ алдарына өйрәнеүселәр өсөн бик ҙур ярҙам итә. Хәҙерге ваҡытта лекторийға йөрөүселәрҙең барыһы ла тип әйтерлек партия тарихенең Октябрҙән һуңғы осорон өйрәнәләр.

Үҙҙәренең теоретик белем кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә тырышып эшләүселәрҙән район Советы башҡарма комитеты председателе Чернов, «Росглавхлеб» тресы управляющие Санников, Өфө станцияһының партия ойошмаһы секретаре Назаров, завод директоры Кузнецов һәм башҡа иптәштәрҙе күрһәтергә мөмкин.

Үҙ алдына уҡып алған белемде ныҡытыуҙа һәм киңәйтеүҙә теоретик беседалар ҙур ярҙам итәләр. Шул уҡ ваҡытта улар коммунистәрҙең уҡыуҙарына контроль яһарға ла мөмкинлек бирәләр. ВКП(б)-ның Молотов райкомы 1947 йылдың октябренән алып ошо ваҡытҡа тиклем 60 тапҡыр теоретик беседа үткәрҙе. Был беседалар коммунистәрҙең актив ҡатнашлығында үтте һәм иптәштәрҙең үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә серьез эшләгәнлектәрен күрһәтте.

Үҙ алдына эшләү күнекмәһе булмаған коммунистәр, бигерәк тә партия членлегенә кандидаттар, «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәктәрендә һәм политик мәктәптәрҙә уҡыйҙар. Районда бөтәһе 36 түңәрәк, 13 политик мәктәп ойошторолоп, уларға 900-ҙән артыҡ кеше йәлеп ителгән. Яҡшы эшләгән түңәрәктәрҙән паровоздар ремонтлау заводының кәтел цехында иптәш Токарев етәкселек иткән түңәрәкте күрһәтергә мөмкин. Түңәрәк члендәре үҙҙәренең етәксеһенән бик ҡәнәғәттәр. Сөнки иптәш Токарев үҙенә лә, уҡыусыларға ла талапсан. Ул үҙенең теоретик белемен күтәреү өҫтөндә өҙлөкһөҙ эшләй, рус художество әҙәбиәте классиктәренең әҫәрҙәрен күп уҡый.

Районлың коммунистәренән һәм партияһыҙ интеллигенцияһынан 120 кеше ВКП(б) ҡала комитетенең кискe марксизм-ленинизм университетында уҡый.

С. Ефимов,
ВКП(б) Молотов райкомының парткабинеты мөдире.

—☆—

Агитатор Ильясов

Көндөҙгө эш ваҡытында этикетщицалар ғәҙәттәгесә ял бүлмәһенә йыйналдылар. Агитатор иптәш Ильясов уларҙы асыҡ йөҙ менән ҡаршы алды.

— Бөгөн партияның өлкә конференцияһы материалдарын өйрәнәбеҙ, — тине ул. — Конференция промышленность предприятиеләренең эшендә быға тиклем булған ҙур етешһеҙлектәрҙе асты һәм уларҙы бөтөрөү юлдарын билдәләне.

Агитатор конференция тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы ентекләп аңлатты. Тыңлаусыларға конференция йомғағын һөйләгән ваҡытта фабрика эшселәренең үҙ тормоштарынан һәм эштәренән алынған миҫалдар һәм фактылар килтерҙе.

— Беҙҙең Беренсе Май исемендәге шырпы фабрикаһы үткән йыл государство планын үтәй алманы. Ә инде этикетка линияһы айырыуса насар эшләне. Фабрикала хеҙмәт етештереүсәнлегенең түбән булыуы, технологик процестең дөрөҫ ойошторолмауы, социалистик ярыш менән бөтә эшселәрҙе лә солғап алыуға тейешле иғтибар бирелмәүе — планды үтәй алмауҙың төп сәбәптәре булып торҙо.

— Беҙҙең алда, — тип дауам итте агитатор, — продукцияның үҙенә төшеү хаҡын кәметеү, бының өсөн хеҙмәт етештереүсәнлеген ҡырҡа күтәреү бурысы тора. Шул саҡта ғына беҙ фабриканың биш йыллыҡ планын дүрт йылда үтәй алырбыҙ. Был тәңгәлдә беҙ быйыл байтаҡ уңыштарға өлгәштек. Беренсе квартал планын 20 мартҡа — Черниковск ҡалаһындағы предприятиелар араһында беренсе булып үтәнек. Ай аҙағына тиклем пландан тыш күп кенә продукция бирелде. Продукцияның үҙенә төшеү хаҡы 8 процентҡа кәметелде. Ошо нигеҙҙә беҙҙең фабрика быйыл ай һайын илгә йөҙәр мең һум файҙа бирел килә.

— Ләкин өлгәшелгәндәр менән мауығырға ярамай, — тип иҫкәртә агитатор. — Үҙ-үҙеңде тынысландырыу совет кешеләренә хас сифат түгел. Өлгәшелгәндәрҙе ныҡытырға һәм яңы уңыштар өсөн ныҡышмалы рәүештә көрәшергә кәрәк. Беҙҙең коллектив май алды социалистик ярышына ҡушылып, һеҙгә билдәле булғанынса, апрель планын 140 процентҡа үтәү йөкләмәһен алды. Тыуған ил алдындағы бурысты үтәү — һәр беребеҙҙең намыҫ эше ул.

Көндөҙгө эш ваҡытында иптәш Ильясов һәр көн бына шундай йөкмәткеле, маҡсатҡа йүнәлешле беседалар үткәрә.

Иптәш Ильясовтың тәҫьирле агитацияһы үҙенең матур һөҙөмтәләрен бирә. Үткән йылдарҙа артта һөйрәлеп килгән этикетка линияһы быйыл планды ай һайын систематик рәүештә 115 — 120 процентҡа еткереп үтәй.

И. Ниғмәтуллин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Редакцияға хаттар

1. Суд ҡарары үтәлмәй

1944—45 йылдарҙа «Урал» колхозында председатель булып эшләгән Ибраһимов Рашит колхоздың 8 мең һумлыҡ байлығын туҙҙырғаны өсөн хөкөмгә бирелгәйне.

Был эште район халыҡ судьяһы иптәш Файласов өс тапҡыр ҡарап, — колхозға яһалған зыянды Ибраһимовтан түләтергә, — тип өс тапҡыр ҡарар ҙа сығарҙы.

Ләкин суд ҡарары әле булһа тормошҡа ашырылғаны — Ибраһимовтан 8 мең һум аҡса колхозға түләтелгәне юҡ. Ул бик тыныс ҡына Куйбышев исемендәге колхозда эшләп килә. Суд ҡарары ҡасан еренә еткерелер икән һуң?

М. Мофаззалов,
Мәсетле районы «Урал» колхозы председателе.

—☆—

2. Культура эшенә иғтибар итмәйҙәр

Торбаҫлы ауылы Иглин район үҙәгенә 30 километр ғына булһа ла, бында культура-ағартыу эштәре бик насар тора. Колхозсылар 10 айҙан бирле кино-картина ҡарағандары юҡ. Халыҡ-ара хәл тураһында докладтар ҙа үткәрелмәйҙәр.

Ауыл йәштәре уйын кисәләрен йыйыштырылмаған һәм таҙартылмаған клубта үткәрәләр. Ауыл Советы библиотекаһындағы китаптар ҙа туҙып, юғалып бөтөп баралар.

Алатыр, Балтй ауыл Советтәрендә лә ошондай уҡ хәл.

Район Советы исполкомының культура-ағартыу бүлеге работниктәре, ни өсөндөр, был ауыл Советтәренә күҙ һалмайҙар, үҙҙәренең төп бурыстарын оноталар.

А. Бикташев.

—☆—

„Ҡыҙыл Башҡортостан" газетаһы материалдары эҙенән

„Ҡарар сығаралар ҙа тынысланалар"

Бәйкыбаш район Советы исполкомы председателенең урынбаҫары иптәш Шәймиев газетабыҙҙың 58-се номерендә — «Ҡарар сығаралар ҙа тынысланалар» тигән баш аҫтында баҫылған хәбәр буйынса редакцияға түбәндәге яуапты бирҙе:

— «Газетаның сығышы дөрөҫ. Район Советы исполкомы был мәсьәләне үҙенең ултырышында тикшереп, иҫке пункттарҙан иген сығарыуҙы көсәйтеү өсөн 25 мартҡан 5 апрелгә тиклем удар уң көнлөк үткәрҙе. Февраль айында иҫке пункттарҙан 530 центнер иген сығарылған булһа, ә март айында 1970 центнер иген сығарылды».

* * *

Маҡар районынан Ҡулбаев иптәш Маҡар сельпоһы председателе Мөхәмәтовтың сельпоға килгән тауарҙарға хаҡ арттырыуын фаш итеп, «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһына хәбәр яҙғайны.

Хәбәр дөрөҫләнде һәм сельпо председателе Мөхәмәтов суд ҡарары менән 5 йылға хөкөм ителде.

ТӘҮГЕ КӨНДӘРҘӘН ҮК БАҪЫУ ЭШТӘРЕН ЙӘЙЕЛДЕРЕРГӘ!

Һәр гектарҙан 100-әр бот иген алыу өсөн

Көткән көндәр етте. Баҫыуға тәүге эштәр башланды. Ғәли Латипов звеноһы колхозда беренсе булып баҫыуға сыҡты. Ул «Киҫем тау» итәгендә күҙ һөрөлгән 60 гектар майҙанда ҡар һыуҙары тотто. Мәликә Ҡәнипова звеноһы «Ҡары ҡамыш» участкаһында 31 гектар майҙандағы ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландыра. Бының өсөн 124 центнер көлөбеҙ бар. Шулай уҡ ужымдарҙы тырматыу эше лә башланды.

Ер һөрөүгә лә әҙерлек алып барабыҙ. Һәр көн 10—15 колхозсы баҫыуҙарҙы сүп-сарҙарҙан таҙарта. Бөгөн-иртән һабанға төшәбеҙ.

Беҙ яҙғы сәсеүҙе 12—13 эш көнөндә юғары сифатлы итеп үткәрәсәкбеҙ. Баҫыу эшендә 101 кеше ҡатнаша. Тәүге көндәрҙән үк баҫыуҙа 3 урында дөйөм туҡланыу урыны ойошторолдо. Иптәш Булатов етәкселегендә агитбригада бригадаларҙа, звеноларҙа политик-массовый эштәр алып бара, стена газетаһы һәм боевой листоктар сығарыла.

— Һәр гектарҙан 100-әр бот урожай!

Был йөкләмәне үтәү өсөн беҙ бөтә көсөбөҙҙө һалабыҙ.

Зәки Ямалетдинов,
Ҡыйғы районы «Яңы батыр» колхозы председателе.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған Ғ. Ф. Мифтахов—Дәүләкән районы «Горный труд» колхозының бригадиры. Уның бригадаһы 1947 йылда 17 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,04-әр центнер арыш урожайы алды.

Г. Машинский фотоһы.

—☆—

Звенолар ярышалар

— Беҙҙең звено 8 гектар арыштың һәм 8 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 20-шәр, ә ҡалған 30 гектар майҙандың һәр гектарынан 15-әр центнер урожай алыу өсөн көрәшә, — ти Ҡариҙел районы «Ҡыҙыл байраҡ» колхозының орлоҡсолоҡ звеноһы етәксеһе Банат Вилданова.

Иптәш Вилданова етәкселек иткән был звено хәҙер ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу эшен башланы. М. Кәримова, Ғ. Әхмәдиева, К. Хөсәенова, Н. Фәтихова һәм Ф. Кәримова иптәштәр 9 гектар майҙанда ужым сәсеүлегенә көл һибеп сыҡтылар. Оҙаҡламай ужымдар тырматыласаҡ.

Банат Вилданова звеноһы Ғәйнифруз Сибғәтова звеноһы менән ярышҡа сыҡты.

Г. Исмәғилов.

—☆—

Сәйфуллина звеноһы алда бара

ДҮРТӨЙЛӨ. (Телефон аша). Районның колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре көндән-көн массовый төҫ ала бара. Бынан бер нисә көн үҙ участкаларында ҡар һыуҙары тотоу эштәре менән шөғөлләнгән звенолар хәҙер ужым сәсеүлектәрен дә өҫтәмә аҙыҡландыралар.

Буденный исемендәге ауыл хужалығы артеле члендәре бер-ике көн эсендә 60 гектар ужым сәсеүлеген аҙыҡландырҙылар. Баҫыуға 180 центнер көл, 90 йөк янған тиреҫ, 7 центнер ҡош тиҙәге сығарылды. Сәйфуллина Ҡәтибә звеноһы был эштә алда бара. Звено 42 гектар майҙанда ужым сәсеүлеген аҙыҡландырҙы.

«Уңыш» колхозында Исмәғилов һәм Бәхтиева иптәштәрҙең звенолары баҫыу эштәренә беренсе булып башланылар.

Г. Хөснәтдинов.

—☆—

Алдынғылар өлгөһөндә

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ. (Телефон аша). «Маяҡ» колхозы члендәре республикабыҙ ауыл хужалығы алдынғыларының хөкүмәт ордендәре һәм медалдәре менән наградланыуына яҙғы баҫыу эштәренә тулы әҙерлек һәм ойошҡан рәүештә сығыу менән яуап бирәләр. 11 апрелдә колхозда сәсеүгә һынау сығышы үткәрелде. Был һынауҙа иптәш Аллаков бригадаһы беренселекте алды һәм бригадаға колхоз правленеһенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Тикшереү сәсеү орлоғоноң тулыһынса етерлек һәм яҡшы сифатлы булыуын күрһәтте. Хәтимә Миңнеголова звеноһы үҙған йыл үҙ участкаһында бойҙайҙың һәр бер гектарынан 14-әр центнер, арыштың һәр бер гектарынан 16-шар центнер урожай алһа, быйыл алдынғылар өлгөһөндә эшләп, бойҙайҙан кәмендә 18-әр центнер, арыштан—20-шар центнер, урожай алырға һүҙ бирҙе.

Үҙған йыл бойҙайҙың һәр бер гектарынан 25-әр центнер урожай алыуға өлгәшкән Зоя Балабанова быйыл тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәшә. Звено члендәре 2 гектар майҙанға сәселәсәк борсаҡ орлоҡтарын ҡул менән сорттарға айырҙылар.

Үҙған йыл колхоз шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүгә тейешле иғтибар бирмәйенсә, унан бик түбән урожай алғайны. Звенолар быйыл Социалистик Хеҙмәт Геройы Банат Батырова тәжрибәһен киң өйрәнеп, был культуранан да юғары урожай алыу бурысын ҡуйҙылар.

М. Ғимадиев.

—☆—

Сәсеүҙе 12 эш көнөндә үткәрәсәкбеҙ

Зианчура районының алдынғы «Красная поляна» колхозы яҙғы баҫыу эштәрен яҡшы әҙерлек менән ҡаршыланы. Колхоздың 3 баҫыусылыҡ һәм бер баҡсасылыҡ звеноһы үҙ участкаларында эш башланы инде. Улар ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу, тәрбиәләү һәм участкаларҙы әҙерләү эштәрен алып баралар.

Колхоздың бөтә эше һәм тартыу көстәре, инвентарҙәре һәм сәсеү материалдары әҙер. Колхозсылар тәүге мөмкинлектәр булыу менән үк баҫыуҙа эштәрҙе йәйелдерәсәктәр.

— Беҙ яҙғы сәсеүҙе 12 эш көнөндә үткәрәсәкбеҙ, — ти колхоз председателе иптәш Зайцев.

Ғ. Идрисов.

Ғ. Рамазанов

Орденле яҡташтар

Яҙ ҡояшы ергә һипкән көндә
Нурҙарының йылыһын, алтынын,
Ҙурла, йырым, дуҫтар күкрәгендә
Йәшнәгән ҡояш балҡыуын!

Йылғыр ҡоштай күңел ашҡынғанда
Бирәү өсөн баҫыу өҫтәрен,
Беҙҙә бөгөн яҙғы ташҡындарҙа
Йөрәктәге ташҡын өҫтәлде.

Республикам!
Бөгөн биҙәп атлай
Димен, Ағиҙелен буйҙарын
Сүкеш-урлаҡ төшкән йөнлөө таҡҡан
Хеҙмәттәге уң бер геройын.

Әйтегеҙсе, һеҙ үткәндә сафта
Ҡарай алыр кемдәр һоҡланмай,
Яҡташтарым, һеҙҙе бөтә Ватан
Һәм Сталин үҙе ҡотлайҙар.

Йылы яҙҙа ергә ҡарҙар иреп,
Һәм пар бөркөп баҫыу тын ала,
Ҡырҙар, ҡырҙар...
Етеҙ елдәр йөрөй
Һеҙҙең данды һөйләп ҡырҙарҙа.

Һәм халыҡтар
Һуғыш ҡырҙарының
Батырҙарын һөйгән шикелле,
Һөйөп әйтә яҡташ ҡырҙарындай,
Егеттәрҙең яҡын исемен.

Гүзәл был яҙ!
Яңы ыштыҡ алып
Ташҡынланып аға ҡар-һыуҙар,
Төҙҙәп күкрәктәргә орден тағып
Пландарға сығыр батырҙар.

Яҡташтарым бирер йөрәк көсөн
Мулыраҡ булһын өсөн уңыштар,
Биш йыллыҡ эш дүрттә тулһын өсөн,
Шатыраҡ булһын өсөн тормоштар.

Дан һәм маҡтау,
Йыр һәм хөрмәт һеҙгә,
Һәм һоҡланып ҡарай ҡояш та,
Батыр яҡташтарым күкрәгендә
Яҡты яйһын алтын ҡолштар!

Колхоз правлениеләренең хужалыҡҡа етәкселеген яҡшыртырға

Республика колхоздарында отчет һәм отчет-һайлау йыйылыштары әле яңыраҡ ҡына үткәрелеп бөттө.

Колхозсылар колхоз правлениеләренең 1947 йыл өсөн отчеттарын актив рәүештә һәм һәр яҡлап тикшерҙеләр, «Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын үтәүҙә һәм колхоз тормошоноң төп законы — ауыл хужалығы артеленең сталинсе Уставын тормошҡа ашырыуҙа үҙҙәренең һәм колхоз правлениеләренең эштәренә тәнҡит күҙенән анализ яһанылар.

Йыйылыштарҙа сығыш яһаусы күп колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар сәсеү майҙанын, бигерәк тә бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанын киңәйтеү, агротехник саралар комплексен ҡулланыу, общественный малдарҙы һаҡлау, уның һанын һәм продуктивлеген арттырыу, колхоздарҙа ярҙамсы хужалыҡ тармаҡтарын үҫтереү, хеҙмәтте ойоштороу һәм хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу буйынса еткелекле эшләмәгән айырым колхоз правлениеләрен ҡаты һәм бик дөрөҫ тәнҡитләнеләр.

Колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштары, насар эшләгән һәм Уставты боҙған өсөн 593 ауыл хужалығы артелендә колхоз правлениеләре составын һәм председателдәрен срогынан алда яңынан һайланылар. Правлениеләрҙең яңы составына колхоздарҙы ныҡытыуҙа һәм общественный байлыҡты арттырыуҙа үҙҙәрен яҡшы күрһәткән алдынғы кешеләр үрләтелде.

Республика колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары йыйылыштарҙа колхоздарҙың общественный хужалығын күтәреүҙә һәм ныҡытыуҙа хөкүмәттең һәм партияның ҙур ярҙамын һәм даими хәстәрлеген билдәләнеләр. Колхоз правлениеләренә ауыл хужалығы артеле Уставын теүәл тормошҡа ашырыу, государство алдында бөтә йөкләмәләрҙе срогында үтәү, хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу, хеҙмәт ойоштороуҙы яҡшыртыу, һәр бер колхозда ваҡ группалы һәм индивидуаль сдельщина методын киң ҡулланыу буйынса конкрет наказдар бирҙеләр.

Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү өлкәһендә сталинсе биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш байрағын күтәргән Алтай крайы игенселәренең патриотик саҡырыуҙарын хуплап, республикабыҙ колхозсылары үҙ өҫтәренә конкрет йөкләмәләр алдылар һәм бөтә халыҡ социалистик ярышына ҡушылдылар.

Алған йөкләмәләрҙе, колхозсыларҙың наказдарын тормошҡа ашырыу буйынса колхоз правлениеләре һәм председателдәре алдында ҙур бурыстар тора. Колхоз правлениеләре отчет-һайлау йыйылыштарында колхозсылар тарафынан асылған серьез етешһеҙлектәрҙе иҫкә алырға һәм уларҙы кисекмәҫтән төҙәтергә бурыслылар. Ауыл хужалығы артеле Уставы колхоз правлениеләренән һәм председателдәренән артелдең бөтә ерҙәрен яҡшы файҙаланыуҙы, һәм уларҙы туҙҙырыуға юл ҡуймауҙы талап итә. Үкенескә ҡаршы, был өлкәлә серьез етешһеҙлектәр йәшәп киләләр. Дөрөҫ сәсеү әйләнешен индереү һәм үҙләштереү, агрономия фәненең өлгәшеүҙәрен, юғары урожай алыусы колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың эш тәжрибәләрен ҡулланыу буйынса күп эштәр башҡарылырға тейеш.

Колхоз правлениеләре бөтә ауыл хужалығы эштәрен раҫланған эш планында ҡаралған сроктарҙа үтәлеүҙе тәьмин итергә тейештәр. Бының өсөн артелдең хеҙмәткә яраҡлы бөтә члендәрен тулыһынса эшкә ылыҡтырырға, бөтә тартыу көстәрен, инвентарҙәрҙе файҙаланырға һәм эшләп сығарыу нормаларының һәр бер артель члены тарафынан үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Колхоз правлениеләре һәм председателдәре эш сифатына айырыуса иғтибар итергә тейештәр. Колхозсылар башҡарған эште бригадирҙар, ә бригада башҡарған эште колхоз председателдәре тарафынан ҡабул итеп алыу тәртибе ныҡлы урынлаштырылһын. Сифатһыҙ башҡарылған эште ғәйепле кешеләрҙән ҡабаттан эшләтергә кәрәк. Көндәлек нормаларҙы сифатлы итеп арттырып үтәүсе колхозсылар бөтә яҡлап дәртләндерелергә тейештәр.

Колхоз правлениеләренә артелдең общественный хужалығын һәр яҡлап үҫтереү менән ныҡ шөғөлләнергә кәрәк. Хужалыҡтың бөтә тармаҡтарын алға ебәреү государство һәм колхозсыларҙың интерестәренә тулы ярашлы. Һәр бер колхоз иген тапшырыу буйынса ғына түгел, бәлки бөтә малсылыҡ продукциялары, йәшелсә, картуф һәм башҡа продуктыларҙы тапшырыу буйынса ла государство алдындағы йөкләмәләрен билдәләнгән сроктарҙа үтәргә бурыслы. Колхоз фермаларында малдарҙың, ҡоштарҙың һандарын арттырыу, уларҙың продукты биреүсәнлектәрен күтәреү, малдарҙы сифатлы аҙыҡ менән тәьмин итеү, тәрбиәләүҙә хужаһыҙлыҡты, әһәмиәтһеҙлекте бөтөрөү, юғалтыуҙарға һәм туҙҙырыуҙарға юл ҡуймау — бөтә колхоз правлениеләренең, малсылыҡ работниктәренең иғтибар үҙәгендә булырға тейеш. Мал тәрбиәләүгә тәжрибәле һәм был эште һөйөүсе кешеләрҙе ҡуйырға кәрәк.

Артелдә баҡса культураларын, картуф күберәк үҫтереү, еләк-емеш баҡсасылығын булдырыу, ярҙамсы хужалыҡтар ойоштороу өсөн бөтә мөмкинлектәр файҙаланылырға тейеш. Артель хужалығы һәр яҡлап үҫә барған һайын, уның экономикаһы ныҡыйсаҡ һәм колхозсыларҙың хеҙмәт көнөнә доход күп бүленәсәк.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һәм аҡлы хеҙмәт дисциплинаһы тәрбиәләү хужалыҡты алға ебәреүҙә хәл иткес шарт. Эштә әһәмиәтһеҙлекте һәм хеҙмәткә түләүҙә уравниловканы бөтөргән, эштең звенолы методын, ваҡ группалы һәм индивидуаль сдельщина ҡулланған күп кенә колхоздар 1947 йылда урожай алыу планын арттырып үтәнеләр, ә айырым бригадалар һәм звенолар үҙҙәренә беркетелгән участкаларҙа һәр гектарҙан 25—30-ар центнер һәм унан да юғарыраҡ урожай алдылар. Республикабыҙҙың ауыл хужалығы новаторҙарының батыр хеҙмәттәрен хөкүмәт юғары баһаланы. Колхозсы, звеновод, бригадир һәм МТС работниктәренән 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, 793 кеше ордендар һәм медалдар менән наградланды.

Эштә әһәмиәтһеҙлек һәм хеҙмәткә түләүҙә уравниловка бөтөрөлмәгән урындарҙа колхоз правлениеләре һәм председателдәре был серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн эшлекле саралар күрергә һәм алдынғыларҙың тәжрибәләрен киң ҡулланырға тейештәр.

Бөтә эштәрҙә колхоз правлениеләре һәм председателдәре күберәк колхозсылар активы менән кәңәшләшергә, уларҙың кәңәш һәм тәҡдимдәренә ҡолаҡ һалырға тейештәр. Ауыл хужалығы артеле Уставының 20-се статьяһында ҡаралғанса, колхоз правлениеһе активтәр ҡатнашлығында, айына кәмендә 2 тапҡыр правление ултырышы һәм колхозсыларҙың дөйөм йыйылышын үткәрергә тейеш. Колхоз правлениелары һәм ревизия комиссиялары ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү саралары тураһындағы СССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1946 йылғы 19 сентябрь ҡарарынан һуң да Уставты боҙоуҙы дауам итеүсе, колхоз милкен, аҡсаһын, игенен, продуктыларын, малын, ерен үҙләштереүсе һәм туҙҙырыусы кешеләрҙе колхозға ҡаршы хәрәкәттәренә еҫ ҡуйырға бурыслылар. Устав боҙоусыларҙы, общественный милекте туҙҙырыусыларҙы колхоз королошоноң дошмандары итеп ҡарап, уларҙы суд яуаплылығына тартырға кәрәк.

Күп кенә колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәре башланды. Яҙғы сәсеү — 1948 йылда юғары урожай алыу өсөн көрәштең беренсе һәм төп этабы. Колхоз правлениеләре һәм председателдәре отчет-һайлау йыйылыштарында колхоз производствоһын ойоштороу буйынса колхозсылар тарафынан индерелгән тәҡдимдәрҙе тормошҡа ашырырға һәм киң йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреүҙе тәьмин итергә бурыслылар.

И. Захаров,
СССР хөкүмәте эргәһендәге колхоз эштәре буйынса Советтең Башҡорт АССР-ы буйынса вәкиле.

ТОРЛАҠ ТӨҘӨЛӨШӨ ЭШТӘРЕНӘ—БОЛЬШЕВИСТИК ТЕМП!

(Төҙөлөш работниктәренең республикан кәңәшмәһенән)

Партия эшенең мөһим участкаһы

Иптәш С. БИКБОВ — ВКП(б) Өлкә Комитете секретаренең нефть промышленносе буйынса урынбаҫары

Беҙҙең партиябыҙҙың һәм Совет Хөкүмәтенең барлыҡ практик эшендә кешеләр тураһында хәстәрлек бөтә тулылығы менән күренә. Государство тарафынан тормошҡа ашырыла барған торлаҡ төҙөлөшө ошо хәстәрлектең береһе булып тора. Шулай ҙа республикабыҙҙа ебәрелгән ҙур средстволар йомшаҡ файҙаланылалар әле. Шуның арҡаһында торлаҡ фонды аҡрын тулыландырыла.

Торлаҡ төҙөлөшө заданиеләренең үтәлмәүе һөҙөмтәһендә промышленность калаларында, бигерәк тә яңы промышленность районларында торлаҡ етешмәү ҡыйынлыҡтары килеп тыуҙы.

Үткән йылда торлаҡ төҙөлөшөнә ебәрелгән ассигнованиеларҙан нефть һәм химия промышленносе предприятиеләре тарафынан бары 43 проценте, ә йорттарҙы эксплоатацияға тапшырыу планы 24 процентҡа ғенә үтәлде. Ағымдағы йылда ла торлаҡтар төҙөү эше ҡәнәғәтләнмәҫлек темптар менән алып барыла.

Күп кенә заводтарҙың һәм төҙөлөш ойошмаларының хужалыҡ һәм партия работниктәре йорттар төҙөүҙе ошоға тиклем икенсе дәрәжәләге эш итеп ҡарап киләләр, был мөһим эш участкаһының политик әһәмиәтен баһалап еткермәйҙәр. Пландың өҙөлөүен һәр төрлө ҡыйынлыҡтар менән аңлатырға тырышалар. Был дөрөҫ түгел. Теләк булғанда һәм беҙҙең шарттарҙа, ошоға тиклемгегә ҡарағанда, бик күп эшләргә мөмкин. Быға «Ишембайнефть» тресы миҫал була ала. Унда хужалыҡ юлы менән индивидуаль йорттар төҙөлөшөн яҡшы ғына ойоштора алғандар, төҙөлөп эшенә йорт бирелә торған кешеләрҙең үҙҙәрен йәлеп иткәндәр.

Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы эшселәрҙең торлаҡ-тормош шарттарын яҡшыртыуҙа партия, совет һәм хужалыҡ ойошмаларының ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүҙәре тураһында бик дөрөҫ күрһәтте. Партия ойошмаларының бурысы—был мөһим эште тамырынан һынылыш яһауға өлгәшеүҙән, торлаҡ төҙөлөшө эшен большевистик темп менән алып барыуҙан тора.

Бында «Ишембайнефть» тресы управляющие иптәш Коваленко төҙөүселәр араһында социалистик ярышты йәйелдереү тураһында ҡиммәтле тәҡдим индерҙе. Мин, уның инициативаһы бөтә төҙөүселәр тарафынан да хупланасаҡ, тип иҫәплайем.

Производство ҡеүәттәрен тулы файҙаланырға

Иптәш А. ГАШЕВ — Башҡорт АССР-ы Госплан председателе

Беҙҙең төҙөлештәрҙең кәрәкле материалдар менән тәьмин ителеп еткерелмәгәнлектәре торлаҡ төҙөлөшө планының ҡәнәғәтләнерлек рәүештә үтәлмәүендә төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Ағымдағы йылдың программаһын тормошҡа ашырыу өсөн тик Өфө—Черниковск узелы буйынса ғына стена материалдарынан — 36 миллион кирбес һәм 21 миллион дана заменителдәр талап ителәсәк. Стәрлетамаҡ — Ишембай промышленность узелы һәм Октябрьск ҡалаһы талаптары айырыуса ҙур.

Беҙ был талапты урында нисек ҡәнәғәтләндерә алабыҙ һуң? Булған производство ҡеүәттәре иҫәбенә. Ҡыҙғаныска ҡаршы уларҙы файҙаланыу бик насар — 50 проценттан да артыҡ түгел. Сөнки күп төҙөлөш ойошмалары бер нисә йылдар инде урындағы мөһим төҙөлөш материалдарын етештереү предприятиеларен барлыҡҡа килтереү мәсьәләһе менән бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр. Туймазы территориаль управлениеһе (начальниге иптәш Бурлаков) кирбес заводын дүрт йыл төҙөй инде. Управляющие иптәш Башилов булған трест республикала икенсе йыл эшләй. Бында ла төҙөлөш материалдары етештереүсе заводтар төҙөлмәгән.

Стәрлетамаҡта кирбес, алебастр етештерә торған күп кенә заводтар бар. Ләкин һуңғы ваҡытта быларҙың производство ҡеүәттәре бигерәк тә насар файҙаланыла. Төҙөлештәрҙең материалдарға булған талаптарын яҡшыраҡ ҡәнәғәтләндереү өсөн йәшәп килгән бөтә заводтарҙы ла тулы ҡеүәтендә хәрәкәткә ебәрергә кәрәк. Ағымдағы йылда төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһе предприятиелары эштәрен байтаҡ яҡшырттылар. Ләкин улар төҙөүселәрҙең ихтыяждарын тулыһынса ҡәнәғәтләндерә алмайҙар.

Хәҙер һәр бер төҙөлештә, һәр бер трестә кирбескә ҡарағанда күберәк шлако-блоктар етештереүҙе ойошторорға кәрәк. Управляющие Башилов һәм Стариков иптәштәр булған трестар уларҙы үҙҙәрендә етештереү иҫәбенә үҙ ихтыяждарының 60 процентен ҡаплай алалар. Туймазы территориаль управлениеһе төҙөлөш материалдары етештереү базаһы булдырыу эше менән һис кисекмәҫтән шөғөлләнергә тейеш. Был мәсьәләлә Ишембай нефтселәре өлгө булып торалар.

Төҙөлөш работниктәренең республикан кәңәшмәһе

ВКП(б) Өлкә Комитетенда республикалағы төҙөлөш ойошмаларының хужалыҡ һәм партия етәкселәренең торлаҡ төҙөлөшө мәсьәләһе буйынса кәңәшмәһе булып үтте. ВКП(б) Өлкә Комитете секретаре иптәш **Ваһапов** кәңәшмәне асып, быйыл торлаҡ төҙөлөшө буйынса ҙур эштәр үткәрелергә тейеш, тип күрһәтте. Өфөлә торлаҡ төҙөлөшө үткәреү тураһында СССР Министрҙәр Советының махсус ҡарары бар. Үкенескә ҡаршы, төҙөлөш ойошмаларының эш йомғаҡтары бөтөнләй ҡәнәғәтләнерлек түгел. Былар хужалыҡ етәкселәренең, партия работниктәренең мөһим мәсьәләгә тейешле иғтибар бирмәгәнлектәре тураһында һөйләйҙәр. Үткән йыл күп ҡалаларҙа торлаҡ төҙөлөшө планы өҙөлдө. Беренсе кварталда ла эш темпы күтәрелмәне.

Унан ары иптәш Ваһапов, быйыл торлаҡ төҙөлөшө планын һис һүҙһеҙ үтәү өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш, тине. Промышленностың уңышлы эшләүе, республика өсөн ҙур әһәмиәтле булған нефть сығарыу һәм эшкәртеүҙе артабан үҫтереү торлаҡ төҙөлөшөн йәйелдереүгә ныҡ бәйләнгән. Партия ойошмалары йорттар төҙөү, ҡалаларҙы, эшсе посёлкаларҙы төҙөкләндереү эшен тура-тура контроль аҫтына алырға, хеҙмәтсәндәрҙең инициативаһын үҫтерергә тейештәр.

Кәңәшмәлә сығыш яһаусы хужалыҡ һәм партия работниктәре үткән йылдағы эш йомғаҡтары, торлаҡ төҙөлөшөн йәйелдереүгә ҡомасаулаған бик күп серьез етешһеҙлектәр тураһында әйттеләр.

Беренсе булып Черниковск төҙөлөш тресының управляющие иптәш **Рудаков** сығыш яһаны. Үткән йылда был трест тотошо менән алғанда заданиены 77 процентҡа, ә торлаҡтар төҙөүҙе бары 39 процентҡа ғенә үтәне. Күрһәтелгән һандар төп иғтибар промышленность төҙөлөшөнә генә йүнәлтелгәнлеге тураһында һөйләйҙәр. Ағымдағы йылда трест 15 мең квадрат метр самаһы торлаҡ майҙанын эксплоатацияға тапшырырға тейеш. Был, трест етәкселегенән һәм партия ойошмаларынан бөтә эште үҙгәртеп ҡороуҙы, эшсе көсөн яҡшыраҡ файҙаланыуҙы талап итә. Үҙгән йылда тресттың стена материалдары етешмәне. Ярҙамсы предприятиеларҙың базаһы уның талабын тулыһынса ҡәнәғәтләндерергә мөмкинлек бирә.

— Эште яҡшыртыу өсөн, — ти иптәш Рудаков,—беҙ индивидуаль йорттарҙы өҙлөкһөҙ ағылыш методы менән төҙөүҙе ойошторорға уйлайбыҙ. Ул эштә беҙҙең бер ни тиклем тәжрибәбеҙ ҙә бар инде. Үҙгән йылда йорттарҙы өҙлөкһөҙ ағылыш методы менән төҙөгәндә эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге 20 проценттан күберәккә күтәрелде. Кирбес ташыу эшен камиллаштереү билдәләнә. Был, уның отходҡа сығыуын кәметәсәк, транспортты етештереүсәнлеген күтәрәсәк. Хәҙер штукатурка эштәрен механизациялаштыра башлайбыҙ инде.

Унан һуң Туймазы территориаль управлениеһенең баш инженеры иптәш Лубянный сығыш яһаны. Был трест эшкә ваҡытлар буйынса билдәләнгән бурыстарҙы үтәмәй ҡала. Ләкин баш инженер трест етәкселегенең эште нисек итеп үҙгәртеп ҡорорға уйлауы тураһында бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Программаһы промышленностың, шулай уҡ торлаҡ төҙөлөшө программаһының ҡәнәғәтләнерлек рәүештә үтәлмәүенең төп сәбәбе — кәрәкле материалдар булмауында. Шуға ҡарамаҫтан, трест етәкселеге кирбесте башҡа ҡалаларҙан алырға иҫәп тота, үҙ производство базаһын тыуҙырыу мәсьәләһе менән шөғөлләнмәй. Иптәш Лубянный төҙөлөш эштәренең насар булыуы сәбәбен эшселәрҙең квалификацияһы түбән һәм материалдарҙың сифатһыҙ булыуынан килгәнлеге менән аңлатты.

Иптәш Лубянный проект ойошмаларын серьез тәнҡит итте. Ул, ҡала тейешле бүлеге булмаған проектлар менән төҙөлә, тип күрһәтте. Төҙөлгән кварталдарҙа электр селтәре юҡ, һалынған дөйөм торлаҡ [illegible] канализация юҡ.

«Башнефть» берекмәһе начальнигының төҙөлөш буйынса урынбаҫары иптәш **Щербов** төҙөүселәргә серьез талаптар ҡуйҙы.

— Үҙгән йылда нефтселәр подряд ойошмаларынан бары 1018 квадрат метр торлаҡ майҙаны алдылар. Ә үҙебеҙ хужалыҡ юлы менән 7350 квадрат метр майҙан төҙөнек. Был билдәле, бик аҙ. Эшселәр араһында торлаҡ етешмәү ҡыйынлыҡтары [illegible]. Артабан ул, быйыл торлаҡ төҙөлөшө өлкәһендә [illegible] эштәр башҡарырға кәрәк икәнлеген күрһәтте. Эште серьез ойоштороуҙа төҙөүселәр — подрядчиктар ҙа [illegible]. Хужалыҡ юлы менән торлаҡтар төҙөү программаһын берекмә Октябрҙең 31 йыллығына үтәү бурысын ҡуя.

«Башнефтезаводстрой» берекмәһе начальнигы иптәш Вовченко БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура управлениеһенең эшендәге етешһеҙлектәр тураһында һөйләне. Төҙөү өсөн ер участкаларын ваҡытында һәм комплекс урынлап бүлеп бирмәй. Мәсәлән, Ишембайҙа нефть заводы эшселәре өсөн индивидуаль йорттарҙы ҡаланан ситтә 4—5 километрҙа һалырға рөхсәт иткәндәр. Черниковск ҡалаһында яңы посёлка төҙөү өсөн урын бүлеү тураһындағы мәсьәләне хәл итеү оҙаҡҡа һуҙылды.

Фекер алышыуҙарҙа шулай уҡ яңы төҙөлөш ойошмаһының начальниге иптәш **Орлов**, «Башнефтезаводстрой» тресы управляющие **Стариков**, СССР Госпланының Башҡортостан буйынса уполномоченныйы **Татевосян**, Башнефтепроект начальнигы **Оконин**, БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура эштәре буйынса управление начальнигы **Сахаутдинова**, «Ишембайнефть» тресы управляющие **Коваленко**, Черниковск ҡала Советының председателе **Крюков**, ВКП(б) Өлкә Комитете секретаре **Должных**, ВКП(б) Өлкә Комитете секретаренең нефть промышленносе буйынса урынбаҫары **Бикбов** иптәштәр һәм башҡалар сығыш яһаны.

Агрегат заводы хужалыҡ юлы менән торлаҡ йорттары төҙөүҙе яҡшы темп менән алып бара. Быйыл 12 һәм 16 квартирлы ике йорт эксплоатацияға тапшырылды. Квартиралар шулай уҡ [illegible] водопровод һәм канализацияланған [illegible] ике йорт эксплоатацияға бирелеү алдында.

Һүрәттә: эксплоатацияға бирелгән йорттарҙың береһе—12 квартиралы йорт. Г. Буравин фотоһы.

Хужалыҡ юлы менән төҙөйбеҙ

Иптәш К. КОВОЛЕНКО — «Ишембайнефть» тресының управляющие

Үткән йылда беҙҙең подряд ойошмабыҙ — төҙөлөш-монтаж управлениеһе 1200 квадрат метр яңы торлаҡ майҙаны төҙөп, эксплоатацияға бирергә тейеш ине. Фактик нефтселәр подрядчиктарҙан бер генә өй ҙә алманылар. Беҙ төҙөлөштө хужалыҡ юлы менән алып барҙыҡ һәм дөйөм майҙаны 1875 квадрат метр булған 75 өйҙө эксплоатацияға бирҙек. Ләкин планды тик 21 процентҡа генә үтәнек.

Сәбәп нәмәлә? Беренсенән, төҙөлөш программаһы беҙгә март айында ғына билдәле булды, уны практик тормошҡа ашырыуға беҙ йәй көнө генә башланыҡ. [illegible] айырым материалдар булманы. Шуның өсөн төҙөлөштә тик 48 генә кеше эшләне, ә план буйынса байтаҡ күп талап ителә ине. Эште тиҙләтеү өсөн өйҙәрҙе [illegible] материалдарҙан һалыу ниғеҙҙәрендә төҙөй башланыҡ. Тик тәҙрә тәптәренә генә кирбес йәки шлакоблок талап ителде. Беҙ элементар механизацияның тормошҡа ашырыу һәм өҙлөкһөҙ ағылыш методы менән эшләүҙе ойошторҙоҡ. Беҙҙең үҙе буштыктар юҡ ине, уны үҙебеҙ яһаныҡ. Үҙҙәренә йорттар төҙөү билдәләнгән эшселәр төҙөлөш программаһын тормошҡа ашырыуға бик ярҙам күрһәттеләр.

Бынан ниндәй йыйымта яһарға мөмкин? Йыйымта шул, әгәр хужалыҡсылар торлаҡтар төҙөүгә серьез тотонһалар, был эште үҙҙәре ойоштора алалар. Беҙ айырым алғанда хужалыҡ юлы менән төҙөү эшен киңәйтеү өсөн [illegible]. Быйыл 100 өйҙө төҙөү, 70 йортто йыйылдырыу һәм разведчиктарға күп кеше торлаҡ бирер бурысын тормошҡа ашырасаҡбыҙ.

Ағымдағы йылда беҙ төҙөлөшкә әҙерлекте алдан башланыҡ. Үткән йылдың хаталарын иҫкә алып, бөтөнсә элек етмәләр өсөн материалдар булдырыу буйынса хәстәрлек күрҙек, площадкаларҙа ваҡ таш һәм ҡом ташыныҡ. Ишембайҙа төҙөлөш материалдары менән эш шәптән түгел. Беҙҙең подряд ойошмабыҙ шлакоблок заводы эшләргә тейеш, эшләмәй тора. «Ишембайнефть» тресы төҙөлөшкә 10 тонна бирә алырлыҡ үҙ алебастр мейесен булдырырға ҡарар итте. Төҙөлөш-монтаж управлениеһе кирбес заводы ла [illegible]. Беҙгә кирбес менән «Башнефть» берекмәһенең Стәрлетамаҡтағы кирбес заводы тәьмин итә, ләкин уның сифаты бик түбән.

Ағас материалдары запасы менән эш насар тора. Трест ағасты Саткала әҙерләнә, ләкин уны тағын алыу хәҙер мөмкин түгел. Тимер юлдың Өфө бүлексәһе начальнигы иптәш Агабековтан беҙгә әҙерләнгән төҙөлөш материалдарын ташып алыуға ярҙам итеүен һорайбыҙ. Беҙ былай ҙа яңы [illegible] материалы эшләп сығарыуҙы ойоштороуға ҡарар иттек. Һаламдарҙы ваҡлау өсөн оборудованиелар һәм насостар кәрәк. Был мәсьәләлә беҙгә берекмә ярҙам итер, ә [illegible] беҙ үҙебеҙ урында яһарбыҙ.

Үткән йылдағы тәжрибәне киң файҙаланып, быйыл беҙ нефтселәр өсөн торлаҡтарҙы күберәк эшләүҙе, төҙөлөш программаһын 7 ноябргә тиклем үтәргә һүҙ бирәбеҙ. Коллектив исеменән мин төҙөлөш подрядчиктарын социалистик ярышҡа саҡырам.

Сифат өсөн көрәш—иғтибар үҙәгенә

Иптәш И. КРЮКОВ — Черниковск ҡала Советы исполкомы председателе

Алдан алынған мәғлүмәттәр буйынса 1948 йылда беҙҙең ҡалала дөйөм майҙаны 35 мең квадрат метр күләмендә булған яңы торлаҡ төҙөлергә тейеш. Был серьез бурысты башҡарып сығыу өсөн төҙөлөш трестарының, контораларының эшен ойоштороуға айырыуса ныҡ иғтибар итергә, эш сифатын күтәрергә кәрәк. Ошоға тиклем беҙҙә күберәк яңы майҙандарҙы эксплоатацияға биреү тураһында ғына хәстәрлек күрҙеләр, ә торлаҡ фондының сифатына бөтөнләй иғтибар бирелмәне.

Черниковск төҙөлөш тресы йорттарҙы бик насар төҙөй. Улар тамам эшләнеп бөтмәйенсә эксплоатацияға тапшырылалар һәм шунлыҡтан улар 2—3 йыл да үтмәй капиталь ремонт талап итәләр. Был етешһеҙлек трест етәкселәре тарафынан иҫәпкә алынырға тейеш. Әгәр үҙәк йылытыу системаһы йәки мейесе юҡ икән, усадьба планлаштырыу үткәрелмәгән икән, ундай йорттарҙы эксплоатацияға тапшырырға ярамай. Ә бындай хәлдәр быға тиклем булдылар.

Мин төҙөлөш тресы управляющие иптәш Башиловтың иғтибарын төҙөлөш эштәренең сифатына йүнәлтер инем. Трест хәҙерге көндә ағастан бер йорт төҙөү эшен алып бара. Унда фундамент урынына кирбес тумбалар ҡуйылған. Уларҙың араларындағы бушлыҡҡа шлак тултырырға һәм штукатурларға иҫәпләйҙәр. Оҙаҡ торормо һуң бындай фундамент?

Йәки бына икенсе мәсьәлә. Төҙөлөш эштәрендә иҙелмәләрҙе дөрөҫ әҙерләй белеү айырыуса әһәмиәткә эйә булып тора. Беҙҙең төҙөлештәрҙә ул эш квалификацияһы аҙ булған кешеләргә тапшырылған. Улар фундамент стеналарҙы штукатурлау өсөн күпме күләмдә цемент һәм ҡом кәрәкләген, алебастр иҙелмәләрен нисек әҙерләргә белмәйҙәр. Уларға бик аҙ төшәндерәләр. Мин управляющие иптәш Башилов булған тресттың төҙөлөшөндә булдым. Бригадала иҙелмәләр әҙерләгән ваҡытҡа ғына тура килдем. Ҡыҙҙарҙан нисә кәрәк цемент, күпме ҡом һалырға тейешһегеҙ, тип һораным. Ләкин улар минең һорауға яуап бирә алманылар. Былай ҡарағанда ябай ғына кәмә һымаҡ булып күренә, ләкин иҙелмәләрҙең дөрөҫ әҙерләнмәүе һөҙөмтәһендә стеналар ҡуба, тәҙрәләр ҡыйшаялар.

Бында Ишембай ҡалаһынан иптәш Коваленко сығыш яһаны һәм торлаҡ фонды төҙөлешең хужалыҡ юлы менән алып барыу тураһында һөйләне. Беҙҙең ҡалалағы заводтарҙың етәкселәре был эш менән насар шөғөлләнәләр, күберәк подрядчик ойошмаларға иҫәп тоталар. Ишембайлылар тәжрибәһен беҙгә ҡулланырға кәрәк. Йорт төҙөлөшө менән бер рәттән балалар учреждениелары биналарын да төҙөргә кәрәк.

Эште тулы комплекс менән алып барырға

Иптәш М. БАШИЛОВ — төҙөлөш тресы управляющие

Беҙҙең трест — республиканың яңы төҙөлөш ойошмаһы. Беҙ үткән йылда тик бер генә ай эшләнек. һәм, тәбиғи, күп нәмә эшләргә өлгөрә алманыҡ. Трест яңы мөһим объектты, эшселәр өсөн торлаҡ һәм культура-ағартыу учреждениелары биналары төҙөргә тейеш. Ағымдағы йылда төп иғтибар культура көн-күреш төҙөлөшөнә, производство базаһы булдырыуға йүнәлтелергә тейеш.

Трест беренсе квартал планын 119 процентҡа, шул иҫәптән торлаҡ төҙөлөшөн — 121 процентҡа үтәне. Эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫә, ғинуарҙа ул — 143, февралдә — 151, мартта — 150 процент тәшкил итте. Үҙенә төшөү хаҡы кәметелде. 3 айҙа беҙ государствоға пландан тыш 200 мең һум файҙа бирҙек. Ағымдағы йылда торлаҡ төҙөлөшө 54 мең квадрат метр күләмендә билдәләнде. Был ҙур һәм яуаплы бурыс.

Техник документация булмау эшкә серьез ҡомасаулай. Беҙҙең даими типтағы йорттар төҙөү буйынса тик бер генә проектыбыҙ бар. Торлаҡ, яңы канализация, водопровод төҙөүгә чертеждар бөтөнләй юҡ. Ләкин, санитар инспекция торлаҡ йорттарын тейешле урында һалмаған иҫәпләгәнгә күрә, госбанк беҙгә төҙөлөш өсөн аҡса бирмәй.

Мин Өфө, Черниковск ҡалаларында һыу менән килеп тыуған хәлгә ҡағылам. Беҙ төҙөлөш эштәре алып барған районда һыу юҡ. Уны 7—8 километрҙан ташырға тура килә. Тейешле ойошмаларҙың был өлкәлә конкрет сара күреүҙәре кәрәк. Канализация менән эш тағы ла насарыраҡ тора. Черниковск нефть эшкәртеү заводында таҙартыу ҡоролмалары юҡ. Бөтә бысраҡтар Ағиҙел йылғаһына барып төшә. Ә был йылғанан көн-күреш кәрәктәре өсөн һыу алына. Ҡала санитар инспекцияһы был хәлде күрмәй. Беҙҙең трест 500 метр оҙонлоғонда канализация тоннеле эшләргә тейеш. Ләкин әлегә тиклем таҙартыу ҡоролмалары төҙөү өсөн проект юҡ.

Теплофикация — бик мөһим бурыс. Йәшәп килгән система бөтөнләй яраҡһыҙ. Минеңсә, торлаҡ төҙөлөшө эштәрен тулы комплекс менән алып барырға, бының өсөн техник документациялар менән ваҡытында тәьмин итергә кәрәк.

Тимер юлсыларға беҙҙең айырыуса талаптарыбыҙ бар. Беҙ һәр көн 30—35 вагон йөк алабыҙ, ләкин улар Черниковскиҙа һис үтеп инә алмаҫлыҡ ерҙәргә бушатылалар. Икенсе ветка төҙөү өсөн проект заданиеһе юҡ.

Өҙлөкһөҙ ағылыш методына киң юл

Иптәш В. АМОСОВ — БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура управлениеһе начальниге урынбаҫары

Мин бында һөйләнгән цифрҙарҙы ҡабатлап тормайым. Улар планды үтәүҙә бик ныҡ артта ҡалыуҙы күрһәтәләр. Мин хужалыҡ юлы менән төҙөүселәр һәм подряд ойошмалары өлгәшергә тейеш булған төҙөлөш эше темптары тураһында әйтергә теләйем.

Управляющие иптәш Рудаков булған трест үткән йыл индивидуаль йорттар һалыуҙа өҙлөкһөҙ ағылыш методын ҡулланып, яҡшы ғына уңыштарға өлгәште. Был турала иптәш Рудаков үҙе лә һөйләне, шуның һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелгәнлеген, эштең сифаты яҡшырғанлығын әйтте. Бөтә Союз конкурсында был трест индивидуаль төҙөлөштең яҡшы сифатлы булыуы өсөн икенсе премия алды. Беҙҙең төҙөүселәребеҙҙә теләк, инициатива булғанда был методтың яҡшы һөҙөмтәләр биргәнлеге һәм уны бөтә индивидуаль төҙөлөштә ҡулланырға мөмкинлек барлығы тураһында һөйләй. Тиҙләтелгән метод менән төҙөү тәжрибәһе бөтә ҡалаларҙа киң ҡулланылырға тейеш.

Күп ҡалаларҙа төҙөлөш эштәренең сифатын ныҡ яҡшыртырға кәрәк. Бигерәк тә был Октябрьск ҡалаһындағы төҙөүселәргә ҡағыла. Нефтселәрҙе тамам төҙөлеп бөтмәгән йәки йыһазландырылмаған торлаҡтарҙа йәшәтеүгә артабан юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү сараларына

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы башҡаланы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса эш башланы. Ҡаланы төҙөкләндереү өсөн государство тарафынан 3 миллион һум аҡса ҡаралған. Был аҡса урамдарҙы асфальтлау, күперҙәрҙе төҙәтеү, баҡса һәм урамдарҙы йәшелләндереү өсөн тотоласаҡ.

Гоголь, Пушкин, Аксаков, Туҡаев, Советский һәм башҡа урамдарҙы — бөтәһе 57 мең квадрат метр урам һәм тротуар асфальтландырыласаҡ. Шуның менән бергә, ҡалаға инеү юллары — Чкалов, Кушнаренко, Черниковск тракттары тәртипкә килтереләсәк.

Урамдарҙы, баҡсаларҙы йәшелләндереү өсөн 195 мең һум аҡса билдәләнгән. Шул иҫәптән 70 мең төп декоратив ағас, ваҡ ҡыуаҡ һәм 12 мең квадрат метр майҙанға сәскә һәм газондар ултыртыласаҡ.

Асфальт йәйеү эштәрен үҙ ваҡытында башлау өсөн хәҙер баҫыҡ урамдарға ҡом һәм ҡырсын ташыла ла инде. Урамдарҙы асфальтлау эштәре май айында башлана.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Генеральный Ассамблеяның икенсе махсус сессияһының асылыуы

НЬЮ—ЙОРК, 17 апрель. (ТАСС). Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының Палестинаның киләсәк хөкүмәте тураһындағы мәсьәләне тикшереү өсөн, Ҡушма Королевство вәкиленең һорауы буйынса, саҡырылған беренсе махсус сессияһы булып үткән һуң бер йыл үткәс, ошо мәсьәләне «артабан тикшереү» өсөн, Ҡушма Штаттарҙың һорауы буйынса 16 апрелдә икенсе махсус сессия асылды. Был һорауҙы Именселек Советенең күпселеге хупланы. Был — «артабан тикшереү» тигән формулировка киң ҡругтарҙа дипломатик фраза тип танылды. Был фраза артында йәшеренеп, Ҡушма Штаттар Палестинаны бүлгәләү буйынса үҙған йылдың ноябрь айында ҡабул ителгән планды ғәмәлдән сығарыу маҡсатында Ассамблеялағы тауыштарҙың өстән ике өлөшөн алырға һәм бойондороҡһоҙ еврейҙәр государствоһын төҙөүгә ҡомасаулыҡ итергә теләйҙәр. Палестинаны бүлеү тураһындағы ҡарарҙы үҙгәртеү маҡсатында тормошҡа ашырыла торған баҫым 16 апрелдә Ассамблеяла быға ҡаршы кешеләрҙе ике иң мөһим постҡа — Ассамблеяның махсус сессияһының председателе итеп —аргентиналы Арсене һәм политик комитеттең председателе итеп Ҡытай вәкиле — Цзян Тин-фуҙы һайлағанда асыҡ күренде.

„Маршалл планы" тураһында „Берлингске тиденде" газетаһы

КОПЕНГАГЕН, 17 апрель. (ТАСС). Консерватив газета «Берлингске тиденде», «Дания властәренә Маршалл планы буйынса ярҙамдың күләмдәре һәм характеры тураһында әлегә тиклем бер нәмә лә билдәле түгел әле», тип яҙа.

«Беҙгә билдәле булған берҙән-бер нәмә шул, — тип күрһәтә газета, — был Маршалл планы ҡабул ителгәнгә тиклем үк әле Данияның 15 миллион доллар суммаға Америка поставкаларын көҙгә тотоусы апрель, май, июнь һәм июль айҙары планын үтәүҙе талап иттеләр. Шундай үк план Америка хөкүмәтенә лә тапшырыласаҡ. Дания беренсе наубәттә май төрҙәләре, бензин һәм тәмәке һораны, Хәҙер, элекке исемлектәр бөтөрөлдө һәм әлегә бер кемгә лә билдәле булмаған яңы исемлектәр менән алыштырылдылар, тип раҫлайҙар».

ГЕРМАНИЯНЫҢ АМЕРИКА ЗОНАҺЫНДА ГЕРМАНИЯНЫҢ БЕРҘӘМЛЕГЕ ӨСӨН РЕФЕРЕНДУМ ҮТКӘРЕҮ ТЫЙЫЛА

ЛОНДОН, 18 апрель. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Берлиндән хәбәр итеүенә ҡарағанда, Америка хәрби губернаторының урынбаҫары генерал Хейс Америка зонаһында Германияның берҙәмлеге өсөн референдум үткәрергә рөхсәт итеү тураһында халҡ конгрессеның һорауын кисә кире ҡаҡҡан.

Грецияла демократик армияның һуғыштары

БЕЛГРАД, 19 апрель. (ТАСС). Азат Грецияның радиостанцияһы кисә Калаврит һәм Драма райондарындағы операциялар тураһында Грециялағы демократик армияның верховный штабы коммюникеһен тапшырҙы. Коммюникела, Пелопоннес штабына буйһонған частәр 11 апрелдә король ғәскәрҙәренең Ҡалавриттәге ныҡытылған базаһына һөжүм иттеләр, тип әйтелә. Был базаны ҙур көстәр һаҡлаған булған. Бер нисә сәғәтка һуҙылған һуғыш һөҙөмтәһендә демократик частәр Калавритте алдылар һәм ҡаланы дошмандан тулыһынса таҙарттылар. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда монархист-фашистәрҙең 98 кешеһе үлгән һәм 150 кешеһе яраланған. Ҡалала булған бөтә ҡоралдар һәм һуғыш припастары баҫып алынған, Король армияһының 200 һалдаты һәм 7 офицере ҡулға алынған. Демократик армияның частәре 10 демократты төрмәнән ҡотҡарҙылар.

Коммюникелә шулай уҡ 14 апрелдә демократик армияның частәре контратака яһанылар һәм дошманды Хизалскалотиҙән ҡыҫырыҡланылар, тип әйтелә. Монархист-фашистәр үлгәндәр һәм яраланғандар менән 20 кеше юғалтҡандар.

Ошо уҡ тапшырыуҙа радиостанция демократик армия частәре Дидимотихон ҡалаһына һөжүм иттеләр һәм ҡалаға өс яҡтан инделәр, тип хәбәр итте.

Чехословакияның именселек органдарының белдереүе

ПРАГА, 19 апрель. (ТАСС). Государство именселек органдары халҡ-социалистик партияһының элекке генеральный секретаре Крайна канцелярияһының күп кенә етәксе сотрудниктәрен яуаплылыҡҡа тарттырыу өсөн юстиция органдарына материалдар тапшырҙылар. Был канцелярия шпиондар үҙәге булып торҙо. Ул 1946 йылда хәрәкәт итә башланы һәм национализациялаған промышленноста, гражданский авиацияла, государство органдарында һәм общественный органдарҙа, шулай уҡ милли именселек органдарында һәм армияла уның киң селтәре булды. Именселек органдары шулай уҡ халҡ-социалистик партияһы хәрби комиссияһының, күрһәтелгәнсә, Прагала ҡораллы путч әҙерләү һәм радио станцияһын баҫып алыуға әҙерлек менән шөғөлләнеүсе ҡайһы бер члендәренә ҡарата суд органдарына материалдар бирҙеләр. Бөтәһе 28 гражданский кеше һәм милли именселек корпусының һәм армияның 26 хеҙмәткәре яуаплылыҡҡа тарттырыла.

Италия депутаттар палатаһына һайлауҙарҙың тәүге йомғаҡтары

РИМ, 20 апрель. (ТАСС). Рим радиоһы кис, депутаттар палатаһына һайлауҙарҙың Италия Эске Эштәр Министерствоһы тарафынан иғлан ителгән түбәндәге һөҙөмтәләрҙе хәбәр итә: 41.647 дөйөм һайлау участкаһынан 21.726 һайлау участкаһы буйынса үткәрелгән һайлауҙарҙа христиан демократтар — 6.388.305, халҡ демократия фронты—4.546.506, «социалистик берҙәмлек» — 950.285, «милли блок» — 424.320, республикан партия — 360.152, монархистар — 302.303, «социаль хәрәкәт» — 249.456, социаль-христиан партия — 38.788 тауыш йыйһаны.

Италияла һайлауҙар

РИМ, 21 апрель. (ТАСС). Анса агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, эске эштәр министерствоһы ҡалған тауыштарҙың бүленеүен иҫәпкә алып, 41.647 һайлау участкаһының 41.643 һайлау участкаһы буйынса депутаттар палатаһына һайлауҙар тураһындағы түбәндәге мәғлүмәттәрҙе иғлан иткән: христиан-демократик партия — 12.751.841 тауыш, халҡ демократик фронты — 8.025.990 тауыш, «Социалистик берҙәмлек» — 1.860.528 тауыш, «Милли блок»— 1.001.156 тауыш, монархистик партия — 729.987 тауыш, республикан партия — 650.413 тауыш, «Көньяҡ Тироль халҡ партияһы» — 122.781 тауыш алдылар. Ҡалған тауыштарҙы ваҡ партиялар алды.

Сенатҡа һайлауҙар һөҙөмтәләре тураһында Италия эске эштәр министерствоһының коммюникеһе

РИМ, 21 апрель. (ТАСС). Эске эштәр министерствоһы сенатҡа һайлауҙарҙың түбәндәге иң һуңғы һөҙөмтәләрен хәбәр итте: 22.427.183 бюллетень дөрөҫ тип табылды. Христиан-демократик партия 10.740.131 тауыш алды; халҡ-демократик фронты — 6.955.229; «Социалистик берҙәмлек»—1.580.722; «Милли блок» — 1.364.741 тауыш; республикан партия — 637.433 тауыш; монархистик партия — 436.597 тауыш; «Социалистик хәрәкәт» — 244.646 тауыш алды.

Ҡалған тауыштар ваҡ партиялар араһында бүленгән.

Валла дъ Аоста һайлау округында (бында мажоритар системаһы буйынса бер кандидат һайлана) христиан-демократик партия 34.562 тауыш алды; халҡ демократик фронты—13.470 тауыш һәм башҡа партиялар — 5.633 тауыш алдылар.

Беҙҙең республикала

Заем тотоусылар отоштар алалар

Хеҙмәтсәндәр араһында государство заемдарын таратыу, заем отоштарын тикшереү буйынса госкредиттең общественный ярҙам комитеттәре ҙур эштәр башҡаралар. Эшселәре, колхозсылары, хеҙмәткәрҙәре государство заемының отоштарын тулау йылдан-йыл арта.

Мәҫәлән, 1945 йылда Башҡортостанда 47,5 миллион, 1946 йылда 58 миллион, 1947 йылда 73 миллион 359 мең, ә реформанан һуң, 1948 йылдың 1 кварталында 367 мең һум отош аҡсаһы түләнгән.

Үҙған йылда Өфө калаһындағы заем тотоусылар 14 миллион 430 мең һум, Черниковск калаһында 5 миллион 579 мең һум, Белорет калаһында 2 миллион 673 мең һум отош аҡсаһы алғандар.

Заводта шахмат турниры

Черниковск нефть эшкәртеү заводында заводта беренселек өсөн шахмат турниры башланды.

Был турнир завод коллективе араһында ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Турнирҙа йөҙҙән артыҡ шахматист ҡатнаша. Завод дирекцияһы турнирҙа еңеүселәргә бүләккә өсөн махсус аҡса фонды бүлде.

Ватан һуғышы инвалидтәренә ссудалар

Беҙҙең хөкүмәтебеҙ Ватан һуғышы инвалидтәренә һәм һуғышта һәләк булыусыларҙың семьяларына йорттар һалыу өсөн оҙаҡ сроклы кредит һәм тәҙеү материалдары менән ярҙам итә.

1947 йылда республиканың калаларында һәм эшселәр посёлкаларында йәшәүсе Ватан һуғышы инвалидтәренә һәм һуғышта һәләк булыусыларҙың семьяларына коммуналь банк аша 3 миллион 4 мең һум оҙаҡ сроклы кредит бирелгән.

Быйыл ошондай маҡсаттарға 2,5 миллион һум аҡса бүленгән. Һуғышта һәләк булыусыларҙың семьяларына йорттар һалыу өсөн ошо йылдың 1 кварталында 33 мең һум аҡса бирелгән.

Тоҙлокүш ГЭС-ы

БӘЛӘБӘЙ. Усень йылғаһы буйында ултырған Тоҙлокүш ауыл Советенең һуғышҡа тиклем бик яҡшы гидроэлектр станцияһы бар ине. Ләкин һуғыш йылдарында яҙғы ташҡын ваҡыттарында был станция сторйҙан сыҡты. Хәҙер был ГЭС-ты аяҡҡа баҫтырыу өсөн «Урняк», «Вишневка», «Ирк», «Красный боец» һәм Нуриманов исемендәге колхоз члендәре эшкә башланылар. Бер нисә йөҙ кубометр таш һәм ағас ташылды ла инде.

Электр оборудованиеләре заводында иптәш А. В. Аринчева етәкселек иткән комсомол-йәштәр бригадаһы ай һайын норманы 200-250 процентҡа үтәй. Ул заводтың күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды.
Һүрәттә: бригадир А. В. Аринчева иптәш эш өҫтөндә.

В. Жданов фотоһы.

Яңы музыкаль әҫәрҙәр

Башҡорт совет композиторҙары союзы ошо көндәрҙә композиторҙарҙан Х. Әхмәтов һәм М. Вәлиев иптәштәрҙең яңы музыкаль әҫәрҙәренә общественный тыңлау һәм улар буйынса фекер алышыу ойоштторҙо.

Башҡорт государство опера һәм балет театры артистәре башҡарылышында һәм фортепианола башҡарыуҙа бөтәһе 7 яңы көй (бишеһе Х. Әхмәтовтыҡы, икеһе М. Вәлиевтеке) һәм композитор Х. Әхмәтов эшләнешендә 4 халҡ көйө тыңланды.

Фекер алышҡанда музыкаль яҡтан яҡшы әҫәр булыуҙары менән Х. Әхмәтовтың «Баҫыу батырҙары» һәм «Беҙҙең армия» тигән марш-йырҙары, Кремль куранттары тигән йыры, М. Вәлиевтең «Таң йыры», «Сирендәр араһында» тигән йыр-романстары юғары баһа алдылар.

Фекер алышыуҙа ҡатнашыусы иптәштәр композиторҙарҙың әле булһа көй яҙыу өсөн түбән сифатлы шиғырҙарҙы ҡулланыуын күрһәтеп үттеләр. Мәҫәлән, Х. Әхмәтовтың көндең актуаль темаһына яҙған, Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына арнап яҙған маршы үҙенең музыкаль яҡтан эшләнеше буйынса юғары торһа ла, уның К. Даян тарафынан яҙылған һүҙҙәре эстелеге яғынан бик шыйыҡ, өҫтөнөҫтән генә яҙылған, тәрән мәғәнәле нәфис, шиғри һүҙҙәргә ярлы, бер һүҙҙәрҙе күп тапҡыр ҡабатлауға ғына тора һәм баҫыу батыры образы тураһында ниндәй ҙә булһа тулы тәьҫир ҡалдыра алмай. Хатта уның исеме үк, баҫыу йәки ялан батырҙары тип әйтһәң урынлы, «ялан батыры» тип автор тарафынан уңышһыҙ алынған һәм башҡа көйҙәң йырҙары автор тарафынан кисектергеһеҙ рәүештә төҙәтелеүҙе талап итә, әлбиттә.

Шуныһы ғәжәп, 7 яңы көйҙән 6-һы К. Даян һүҙҙәренә яҙылған һәм йырҙар яҙыуҙа «ҡаламын осмартҡан» Даян иптәш һан артынан ҡыуып уларҙың сифатына тейешле эстәлекле булыуына тейешле иғтибар бирмәй башлаған, күренеп тора.

Ошо уңай менән, фекер алышыуҙа ҡатнашҡан иптәштәр композиторҙарға, киләсәктә музыка яҙғанда Сәйфи Ҡудаш, Мостай Кәрим, Рәшит Ниғмәти, Ғәйнан Әмири, Хәниф Кәрим һәм башҡа шағирҙәрҙең уңышлы әҫәрҙәренән дә файҙаланырға кәңәш бирҙеләр.

Р. Хәйруллин.

Эшселәрҙең уҡыуы

«Башнефть» берекмәһе нефтселәрҙең квалификацияларын күтәреүҙә ҙур хәстәрлек күрә. «Ишембайнефть» һәм «Туймазынефть» тресттары янында ике уҡыу комбинаты һәм Туймазыла автошкола йәшәп килә.

1947 йылда был уҡыу комбинаттары 2 мең 249 кешене нефть эшселәре итеп әҙерләп сығарҙылар. Бынан башҡа 2 мең 812 эшсе квалификация күтәреү курстарында уҡып сыҡты. Һөҙөмтәлә бөтә бораулау конторалары бораулау кадрҙары менән тулыһынса тәьмин ителделәр.

1948 йылда яңы эшселәр әҙерләү һәм эшселәрҙең квалификацияларын күтәреү буйынса эш киң алып бара. Хәҙерге көндә нефть мастерҙарҙан һәм бригадирҙарҙан 140 кеше 6 айлыҡ курста уҡый. Шулай уҡ етәксе работниктарҙан 175 кеше уҡыуға йәлеп ителгән.

Ошо йылдың апрель айының икенсе яртыһында «Башнефть» берекмәһе Черниковск ҡалаһындағы нефть институты эргәһендә техниктәр, юғары квалификациялы мастерҙәр әҙерләү буйынса 30 кешелек бүлек асасаҡ.

Ике самолеттың һәләкәткә осрауына ҡарата

ЛОНДОН, 20 апрель. (ТАСС). Кисә Рейтер агентствоһы ошо йылдың 5 апрелендә Берлин өҫтөндә Британия һәм Совет самолетының бәрелешеүен тикшереү буйынса Англия комиссияһының отчетын тапшырҙы. Күрһәтелгән комиссия, йәнәһе, «ике самолеттың бәрелешеүе совет истребителенең хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә килеп сыҡҡан» тип раҫлай.

Был ялғанды Англияның сит ил эштәре министре Бевин 19 апрелдә общиналар палатаһында тулыһынса яҡланы.

БЕРЛИН, 18 апрель. (ТАСС). Британия һәм Совет самолеттарының Берлин аэродромы Дальгоф өҫтөндә 5 апрелдә бәрелешеү сәбәптәрен тикшереү буйынса совет тикшереү комиссияһы тарафынан түбәндәгеләр билдәләнгәйне: беҙҙең өйрәнеү-күнегеү самолеты «ЯК—3» совет аэродромы Дальгоф өҫтөндә өйрәнеү осошонда булған саҡта аэродромға төшөү өсөн юнәлгәс Англия пассажир самолеты болоттар араһынан килеп сығып үҙенең моторҙары менән совет самолетының ҡойроғона һуғылды. Был һуғылыу һөҙөмтәһендә ҡойроғо ватылған совет самолеты идара ителеүен юғалтты һәм ватылды. Англия самолеты һуғылыу һөҙөмтәһендә һауала яна, ватыла башланы, һәм ергә төшөп янып бөттө.

Англия самолетының осоу ҡағиҙәләрен боҙоуы һәм болоттарҙан килеп сығыуы бәрелешеүгә сәбәп булды. Шулай итеп Англия администрацияһы Англия самолетының осоуы өсөн һауа ҡурҡынысһыҙлығының Берлин үҙәгенән алдан рөхсәт алманы. Бындай рөхсәт алыу Контроль Советы эргәһендәге хәрби-һауа директоратының ҡағиҙәләрендә ҡаралған.

Совет яғы сәбәптәрҙе ентекләп тикшереү маҡсатында 5 апрелдә уҡ ҡатнаш Англия-Совет комиссияһын төҙөүҙе тәҡдим иткәйне. Ләкин дүрт көндән һуң ғына Британия командованиеһе был комиссияны төҙөү тураһында үҙенең ризалығын белдерҙе.

Тикшереүҙәр башланғанға тиклем үк Британия яғы ике самолеттың һәләкәткә осрауы билдәле булыуға һәм дәлилдәрҙең етерлек булыуына ҡарамаҫтан, «әгәр экспертар килешелгән ҡарарға килә алмайҙар», тип ике яҡтың да экспертәре тарафынан айырым докладтар талап итеүе тураһында мәсьәлә ҡуйҙы. Ике яҡлы комиссияның артабан эштәренән күренгәнсә, Британия яғының был аҙымы ике яҡлы тикшереүҙе өҙөү буйынса дөйөм теләгенә ингән булһа кәрәк. Быны түбәндәгеләрҙән күреп була: ҡатнаш комиссия ултырыштарында Англия вәкилдәре һәләкәттең объектив сәбәптәрен тикшереүҙән алдан уйланған фекер буйынса баш тарттылар.

Совет вәкилдәрендә булған бөтә фактик мәғлүмәттәр Британия вәкилдәренә тапшырылды. Ләкин Британия экспертәре был мәғлүмәттәрҙе алып, ҡатнаш комиссияға Британия материалдарын биреүҙән баш тарттылар. Англия вәкилдәре шулай уҡ үҙҙәренең һәләкәт тураһындағы ялған фекерҙәрен бергәләп тикшереү өсөн ҡуйманылар.

Британия экспертәренең һәләкәтте фәнни яҡтан тикшереүҙән ситләшеүҙәре, Британия яғының беренсе наубәттә ниндәйҙер «шаһиттарҙан» һорашырға, тип ныҡышмалы талап итеүҙәре Англия вәкилдәренең фактик мәғлүмәттәр нигеҙендә һәләкәттең ысын сәбәптәрен билдәләүҙән ҡурҡыуҙарын һәм шуға күрә ҡатнаш комиссияның эшен яһалма рәүештә, алдан уйланған фекер буйынса боҙорға теләүҙәрен күрһәтте.

Былар дөрөҫләнделәр: Британия вәкилдәре 13 апрелдә бер яҡлы тикшереүгә күсеүҙәре тураһында белдерҙеләр.

Германиялағы совет-хәрби администрацияһы информацион бюроһының ошо көндәрҙә матбуғат вәкилдәренә белдереүендә былай тип әйтелә: совет яғы һауа һәләкәтенә килтереүсе сәбәптәрҙе һәм шарттарҙы тикшереүҙе дауам итә. Ул әлеккесә ике яҡлы комиссияның эшендә ҡатнашырға әҙер. Ләкин был эш айырым рәүештә Британия яғына йәки совет яғына ниндәйҙер «күҙәтеүселәр» ебәреү тәртибендә түгел, ә бергәләшеп эшләү нигеҙендә башҡарылырға тейеш. Былай эш итмәү берләшкән комиссияның бергәләп эшләү принцибенә ҡаршы килә. Ә инде шаһиттар мәсьәләһенә килгәндә, шаһиттарҙан дөрөҫ мәғлүмәттәр алыу өсөн комиссия иң тәүҙә объектив мәғлүмәттәр һәм документле дәлилдәр билдәләргә тейеш һәм бынан һуң ғына шаһиттарҙан һорашырға тейеш. Шуның менән бергә, объектив мәғлүмәттәр шундай картиналарҙы күрһәтерҙәр, был саҡта шаһиттарҙан һорашыу һәләкәттең сәбәптәрен билдәләү өсөн ғөмүмән икенсе дәрәжәләге ролде уйнар ине.

Совет экспертәре тип әйтелә информация бюроһының белдереүендә, ике яҡлы тикшереүҙе дауам итеүҙе талап итә. Ләкин, әгәр ҙә ике яҡлы тикшереү Британия яғы алған позиция һөҙөмтәһендә мөмкин булмаһа, улар үҙ ҡарамаҡтарында булған объектив мәғлүмәттәрҙе бер яҡлы тәртиптә белдерә алырҙар.

Донъя шахмат чемпионаты

Союздар Йортоноң колонналар залында 20 апрелдә донъя беренселегенә шахмат матч-турниренең 15-се туры булды. Был турҙа Керес—Ботвинник, Решевский — Эйве осраштылар.

Ике совет гроссмейстре Керес менән Ботвинник партияһында көрәш, самаса, ике яҡ өсөн дә тигеҙ ыңғайыс менән барҙы. Был уйын кисектерелде, ике яҡтың да ладъялары, Керестең — өс, Ботвинниктең — дүрт пешкаһы бар.

Решевский — Эйве уйыны бер яҡтың да отмауы менән бөттө.

Ун биш турҙан һуң Ботвинниктең ун берҙән — 8 очкоһы, бер кисектерелгән уйыны, Решевскийҙең ун берҙән — 6 очкоһы, бер кисектерелгән уйыны, Керестең ундан — 5,5 очкоһы, ике кисектерелгән уйыны, Смысловтың ун икенән — 5,5, Эйвенең — 3 очкоһы бар.

* * *

21 апрелдә Керестең Решевский һәм Ботвинник менән үткән турҙарҙа уйнап бөтмәгән партияларын уйнап бөтөү булды. Решевский — Керес партияһы көтөлмәгән һөҙөмтә менән бөттө: аҡтарҙың артыҡ пешкаһы бар ине. Керес дөрөҫ йөрөштәр яһап, үҙенә ҡаршы уйнаусыны 64-се йөрөштә бирелергә мәжбүр итте.

Керес — Ботвинник партияһы тағы кисектерелде, ул 23 апрелдә уйнап бөтөләсәк.

15 турҙан һуң Ботвинниктең — 8 очкоһы, бер уйнап бөтөлмәгән партияһы, Керестең — 6,5 очкоһы, бер уйнап бөтөлмәгән партияһы бар. Уларҙан ҡала барыусы Решевскийҙең очкоһы—6, Смысловтың — 5,5, Эйвенең — 3.

22 апрелдә Союздар Йортоноң Колонналар залында 16-сы тур — матч-турнирҙең 4-се ҡругының беренсе туры башлана. Был турҙа Решевский — Смыслов, Керес — Эйве осрашасаҡтар. Ботвинник уйындан буш.

(ТАСС).

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — «ЕТЕ ЮЛ САТЛЫҒЫНДА». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.
«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта»—«ЦАРИЦЫНДЫ ОБОРОНАЛАУ».
Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25 Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00719 Өлкә газета-журналдар типографияһы. X. — 1. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

28-се йыл сыға

1948 йыл
№ 82
24
апрель
шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

В. И. Ленинде иҫкә алыу. (1-се бит).
Беҙҙең республикала. (1-се бит).
М. Волин. — В. И. Ленин Әҫәрҙәренең ун биренсе томы. (2-се бит).
Советтәр Союзында. (2-се бит).
Хәниф Кәрим. — Ҡәҙерле ҡунаҡ. (2-се бит).
ЮҒАРЫ УРОЖАЙ МАСТЕРҘАРЕНЕҢ ТӘЖРИБӘЛӘРЕН УРТАҠЛАШЫУ. В. Ғирфанов. — Сәсеү нормаларын дөрөҫ ҡулланыу урожайҙы күтәрә. (3-сө бит).
М. Кәримов, С. Мәүлотов. — Дим станцияһын әҙәкләктән сығарырға. (3-сө бит).
Г. Орлов. — Һал ағыҙыуҙы уңышлы үткәрергә. (3-сө бит).
РЕДАКЦИЯҒА ХАТТАР. (3-сө бит).
Я. Бәдретдинов. — Һаҡлыҡ кассаларының халыҡты хеҙмәтләндереүен яҡшыртырға. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Кадрҙар тураһында большевиктарса хәстәрлек күреү—партия ойошмаларының мөһим бурысы

Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең биш йыллыҡ планында ҡуйылған яуаплы бурыстар партия ойошмаларынан, бөтәһенән элек, кадрҙар менән эшләүҙе, улар тураһында даими хәстәрлек күреүҙе талап итә. Сөнки партия билдәләгән программаны, политик линияны кешеләр, кадрҙар тормошҡа ашыралар. «Дөрөҫ линия бирелгәндән һуң, мәсьәләне дөрөҫ хәл итеү билдәләнгәндән һуң, — тип өйрәтә иптәш Сталин, — эштең уңышы ойоштороу эшенә, партия линияһын тормошҡа ашырыу өсөн көрәште ойоштороуға, кешеләрҙе дөрөҫ һайлап алыуға, етәксе органдарҙың ҡарарҙарының үтәлешен тикшереүгә бәйләнгән».

Башҡортостан партия ойошмаһының күптән түгел булып үткән XXI конференцияһы республикабыҙҙа кадрҙар менән эшләүҙә ҙур етешһеҙлектәр булыуын билдәләп, партия ойошмаларынан кадрҙар һайлап алыу, уларҙы тәрбиәләү һәм улар тураһында даими хәстәрлек күреү эшен яҡшыртыуҙы талап итте. Сөнки был тәбиғи хәл. Тик һуңғы ярты йыл эсендә генә Башҡортостанда меңәрләгән йәш кадрҙар партия, совет органдарында етәксе эшкә үрләтелде.

Урындағы Советтәргә, партия ойошмаларының һәм колхоздарҙың етәксе органдарына быйыл ҡыш үткән һайлауҙарҙа, бигерәк тә, ауыл Советтәренең, тауге партия ойошмаларының һәм колхоз правлениеларенең етәкселегенә бик күп һанда йәш кадрҙар килде. Был кадрҙарҙы эшкә өйрәтеү, тәрбиәләү ВКП(б) райкомдарының һәм хеҙмәтсәндәр депутаттары район Советтәре башҡарма комитеттәренең иң мөһим бурыстары булып тора.

Һайлауҙарҙан һуң районда [illegible] партия ойошмалары секретарҙарының, ауыл Советтәре председателдәренең һәм секретарҙарының, шулай уҡ колхоз председателдәренең семинарҙары үткәрелде.

Ләкин эшкә яңы үрләтелгән йәш кадрҙарҙың большевистик етәкселек стиленә эйә булыуҙарына [illegible] өсөн был семинарҙар ғына аҙ әле. [illegible]

[illegible] ВКП(б)-ның Салауат районы инструкторы иптәш Мифтахов [illegible] «Маяк» колхозында була. Хужалыҡ мәсьәләләре буйынса колхоз председателе менән [illegible] иптәш Фәрхнев [illegible] Бындай фактылар беҙҙең райком работниктарыбыҙҙың эш практикаһында бик йыш осратырға мөмкин. Ләкин ауыл, колхоз кадрҙарына бындай «ярҙамдың» большевистик етәкселек стиле менән һис бер уртаҡлығы юҡ.

Партияның урындағы ойошмалары кадрҙарҙан эш талап иткән кеүек, улар тураһында хәстәрлек күрергә, уларға эш һәм көн-күреш шарттары ла тыуҙырырға тейештәр.

Беҙҙең партиябыҙ һәм иптәш Сталин кадрҙарҙы һайлап алыу эшенә һәр ваҡыт ҙур иғтибар бирергә, кешеләрҙе һүҙҙәренә ҡарап түгел, ә практик эштәренә ҡарап баһаларға өйрәтәләр. Партия, совет органдарының һәм хужалыҡ ойошмаларының етәкселек эшенә үрләтелгән кадрҙар партия политикаһын, хөкүмәт ҡарарҙарын аңлауҙы, уларҙы тормошҡа ашырыу өсөн көрәшкә һәләтле кешеләр булырға тейеш. Ләкин, бына ВКП(б)-ның Абзан райкомы (кадрҙар буйынса секретаре иптәш Азнабаев) кешеләрҙе һүҙҙәренә, вәғәҙә биреүҙәренә ҡарап үрләтеүгә юл ҡуйған. Шул арҡала, тик бер райпотребсоюз аппаратында ғына һуңғы бер йыл ваҡыт эсендә йәҙгә яҡын кеше алмашынған. Иптәш Азнабаев тарафынан сауҙа эшенә тәҡдим ителгән Иҙелбаев ике ай эсендә 7 мең һумдан артыҡ растрата яһаған. Ә райсоюз системаһын тотош алғанда ошондай үҙгынсылар тарафынан бер йыл эсендә 50 мең һумлап государство аҡсаһы үҙләштерелгән. Был факт тик үҙе генә лә кадрҙар һайлап алыуға серьез ҡарашта булыу кәрәклеген бик асыҡ раҫлай.

Партияның өлкә конференцияһы етәксе кадрҙарҙың идея-теоретик [illegible]

[illegible]

Производство процессенә етәкселек итеү [illegible] специалистарҙан күберәк [illegible] агрономдарҙы, инженерҙарҙы, техниктарҙы һәм башҡа специалистарҙы аппарат эшенән, канцелярия эшенән бушатып, уларҙы туранан-тура производство процессенә етәкселек итеү эшенә күсерергә кәрәк.

Иптәш Сталин «кадрҙарҙы хәстәрлек менән үҫтереү [illegible]

[illegible] ВКП(б) райкомдарының һәм бөтә партия ойошмаларының иң мөһим бурысы ул.

В. И. Ленинде иҫкә алыу

22 апрелдә В. И. Лениндең тыуыуына 78 йыл тулды. Мәскәү предприятиеларендә һәм учреждениеларендә был дата айҡанлы Владимир Ильичтең тормошо һәм эше тураһында, большевиктар партияһын һәм донъяла беренсе социалистик государствоны төҙөүсе бөйөк кешеләр — В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең боевой дуҫлығы тураһында лекциялар һәм беседалар үткәрелә.

21 апрелдә төшкө тәнәфес ваҡытында, башҡаланың иң күптән бирле йәшәп килгән предприятиеларенең береһендә — Владимир Ильич исемендәге заводтағы бөтә цехтарҙа беседалар үткәрелде. Ошо заводта Ленин менән осрашҡан һәм уның сығыштарын тыңлаған ҡарт кадровиктар йәштәргә үҙҙәренең иҫтәлектәрен һөйләнеләр. Завод клубындағы кисәлә художестволы һүҙ мастерҙары В. Маяковскийҙың Ленинға арналған әҫәрҙәрен уҡыған саҡта һәҙерләгән эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр ҡатнаштылар. Вокаль ансамбле Ильичтең бик яратып йырлаған йырҙарын башҡарҙы.

Башҡаланың Ленин районы хеҙмәтсәндәре ошо иҫтәлекле датаны киң рәүештә билдәләйҙәр. Государствоның 2-се номерлы шарикоподшипник заводы йәштәре Владимир Ильичтең йәш сағы һәм революцион эшмәкәрлегенең башланыуы тураһында лекция тыңланылар. «Красный пролетарий», Орджоникидзе исемендәге һәм башҡа заводтарҙа Лениндең тормошо һәм эше тураһында лекциялар уҡылды. 22 апрелдә район предприятиеларенең цехтарында, элекке һайлау участкаларында, ғилми-тикшереү институттарында, юғары уҡыу йорттарында һәм мәктәптәрендә беседалар үткәрелде.

Меңәрләгән мәскәүлеләр һәм унда килгән кешеләр 21 апрелдә В. И. Лениндең үҙәк музейына барҙылар. (ТАСС).

Беҙҙең республикала

Стахановсы вахталар

БЛАГОВЕЩЕН. «Краснооктябрь» заводы коллективы 1 Май байрамын производство бүләге менән ҡаршыларға әҙерләнә. Коллектив I квартал планын 130 процентҡа үтәне.

Заводтың коллективы апрель айында планды 50 процентҡа арттырып үтәргә йөкләмә алды. Хәҙер бөтә цехтар ҙа 1 май хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫтылар. Ҡаҙаҡ эшләү цехында коммунист Беляев етәкселек иткән күп станоксылар бригадаһы, ауыр хеҙмәт талап иткән эштәрҙе башҡарып, смена заданиеһын һәр ваҡыт арттырып үтәй. Иптәш Фельков сменаһында эшләүселәр 8-әр станокты хеҙмәтләндереп, айырым көндәрҙә икешәр норма эшләйҙәр.

* * *

Электр оборудованиелары заводының (директоры иптәш Алексеенко) цехтары, группа һәм бригадалары коллективтәре 15 апрелдән алып май алды стахановсы вахтаһына баҫтылар. Эшселәр байрамды юғары производство күрһәткестәре менән билдәләү өсөн фиһакәр эшләйҙәр. Начальнигы иптәш Флёдер булған цехтың Сәнтов, Валиев етәкселек иткән йәштәр бригадалары көн дә өсәр норма бирәләр. Март айы программаһын 146 процентҡа тамамлаған Сергеев, Ермолаев иптәштәрҙең шлифовальщиктәр группалары вахтаның тәүге көндәрендә эш нормаларын ике-өс тапҡырға арттырып үтәнеләр.

Р. Сафин.

Үҙ инициативалары менән

Социалистик ярышта алдынғылыҡты үҙ ҡулында тотоп килгән Өфө—Мәскәү поезының проводниктәр коллективы яңы инициатива башлап ебәрҙеләр. Улар поезд Өфөлә торған ваҡытта вагондарҙы буяттылар, вагондар ара бәйләнеш телефондарын ремонтланылар, пассажирҙарҙы тормош көнкүреш яҡтан хеҙмәтләндереү кимәлен яңыҡа баҫтырып, уның постель кәрәк-яраҡтарын яңырттылар. Вагондарҙың шторҙарын һәм гардиналарын алмаштырҙылар.

Алдынғы состав коллективы миҫалына башҡалар ҙа ҡушылдылар. Хәҙер Шляхова һәм Колесникова иптәштәрҙең проводниктәр бригадаһы үҙҙәренең поезын ремонтлайҙар һәм йыһазландыралар.

Киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыу арта

Республиканың промысловой кооперацияһы һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышҡа ҡушылып, киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыуҙы арттырғандан-арттыра бара. Быйыл күн аяҡ кейемдәре эшләү 200 мең пар урынына 250 мең парға еткерелә. Шулай уҡ быйма баҫыу ҙа, үткән йылға ҡарағанда, мең парға артасаҡ. 130 мең метр кижемамыҡ туҡымалары эшләнәсәк. Трикотаж әйберҙәре, кондитер изделиелары, колбасалар һәм башҡа әйберҙәр эшләп сығарыу ҙа байтаҡ арттырыла.

Шуның менән бергә, киң ҡулланыу тауарҙарының ассортименте лә киңәйә. Быйыл промкооперация работниктәре 19 төрлө яңы әйбер эшләп сығарыуҙы үҙләштереү бурысын ҡуйҙылар. Мәҫәлән, утҡа сыҙамлы кирбес, һәр төрлө быяуҙар эшләнәсәк.

Ағымдағы йылда Башҡортостан промкооперацияһы 19 яңы предприятие төҙөүҙе планлаштырҙы. Мәҫәлән, Ишембай ҡалаһында йылына 200 мең черепица бирә торған черепица заводы. Охлебининала утҡа сыҙамлы, кирбес эшләү заводы төҙөлә башланы. Ул йылына 900 мең кирбес эшләп сығарасаҡ. Өфөлә керәсин лампалары эшләй торған завод төҙөлә. Ул йылына 10 миллион һумлыҡ продукция бирергә тейеш.

Черниковск ҡалаһында механика мастерскойҙары, Стәрлетамаҡта өс производство цехы ойошторола. Өфөлә тәмле аҙыҡтар һәм киң ҡулланыу тауарҙары һатыу өсөн ике ҙур магазин асыла.

«Ишембайнефть» тресының беренсе промыселендә эшләүсе алдынғы йәш нефтселәр.

Һүрәттә (һулдан уңға): Өлкән оператор Р. Ғайсин, нефть үсәүсе З. Пендрина, мастер ярҙамсыһы Б. Фролов, өлкән оператор Е. Бабикова иптәштәр. Улар беренсе кварталда пландан тыш унлаған тонна нефть сығарып, йәш нефтселәрҙең икенсе республикан слетында ҡатнаштылар.

В. Жданов фотоһы.

Ишембайлылар—байрамға

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Нефтселәрҙең май алды социалистик ярышында «Ишембайнефть» тресының беренсе промыселы коллективы (директоры иптәш Славинский) ҙур хеҙмәт күтәренкелеге менән эшләй. Промысел үткән кварталда нефть һәм газ сығарыу планын 105,8 процентҡа үтәп, илебеҙгә пландан тыш йөҙҙәрсә тонна нефть биргәйне. Коллектив апрель айында темпты тағы ла көсәйтте. Был айҙың 20 көнендә нефть сығарыу 106,3, газ сығарыу 115,1 процентҡа үтәлде. Алдынғы нефть сығарыу мастерҙары промыселға бирелгән планды ғына түгел, ә балки үҙҙәре алған йөкләмәләрҙе лә арттырып үтәйҙәр. Мастер Копылов участкаһы апрелдә йөкләмәһен 102,7 процентҡа үтәп килә. Шулай уҡ мастер Серяков участкаһы коллективы лә уҙан ҡалышмай.

Промысел 1948 йылда эшләмәй ултырған ете скважинаны яңынан эксплоатацияға биреп, уларҙан нефтте планға ҡарағанда байтаҡ күберәк алды. 35 скважина термокислота һәм ҡайнар нефть менән эшкәртелеп, йөҙҙәрсә тонна өҫтәмә нефть алынды.

Икенсе промысел коллективында ла (директоры иптәш Перегудов) нефть өсөн көрәш көндән-көн көсәйә. Мастер Гончаровтың участкаһы апрелдең егерме көнлөк производство планын 106 процентҡа үтәне. Был коллектив араһында өлкән операторҙарҙан Пустовгар һәм Поветков иптәштәрҙең вахталары айырыуса яҡшы күрһәткестәргә өлгәштеләр. Иптәш Пустовгар вахтаһы егерме көнлөк норманы 110, иптәш Поветков вахтаһы 105 процентҡа үтәне.

Нефтселәр Май байрамын тағы ла яҡшыраҡ эшләү, илебеҙгә тағы ла күберәк нефть биреү менән ҡаршылау өсөн намыҫлы көрәшәләр.

Г. Ибраһимов.

Күмер тейәүселәрҙең уңышы

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Тимер юл станцияһының күмер склады коллективы май алды социалистик ярышҡа ҡушылып алған йөкләмәләрен үтәү өсөн намыҫлы эшләй. Март айында күмер тейәү һәм бушатыу заданиеларенең үтәлеше 115 процент тәшкил итте. Апрель айында ла заданиелар арттырылып үтәлде.

Күмер күтәреү кранының өлкән машинисы иптәш Найденов, лунинселәр методы менән эшләп, яҡшы өлгөләр күрһәтә. Ул кранды үҙе ремонтлай һәм ошо арҡала ай һайын 400—450 һум экономия яһай. Иптәш Найденов хеҙмәтләндергән кран В. В. Куйбышев исемендәге тимер юл магистралендә ике йылдан бирле беренсе урынды алып килә.

Иптәш Уросов етәкселек иткән бригада күмер тейәүҙә һәм бушатыуҙа смена заданиеларен систематик рәүештә 190 процентҡа үтәй. Был бригада менән ярышыусы Ельмеев иптәш бригадаһы члендәре лә йөкләмәләрҙе үтәүҙә намыҫлы эшләйҙәр.

1951 йыл иҫәбенә

Черниковск ҡалаһындағы машиналар төҙөү заводының Ямалетдинов һәм Хисаметдинов иптәштәр етәкселек иткән заточниктәр бригадаһы, май алды социалистик ярышына ҡушылып, үҙҙәренең биш йыллыҡ нормаларын 1 май көнөнә үтәп сығырға йөкләмә алғайнылар. Йөкләмә срогынан алда үтәлде. 10 апрелдән инде был бригадалар 1951 йыл иҫәбенә эшләйҙәр.

В. Памирский.

Учалы горняктәренең уңыштары

Мастер Терегулов сменала 45 норма бирҙе

УЧАЛЫ. (Телеграф аша). Рудниктең горняктәре май алды йөкләмәләрен намыҫлы рәүештә башҡарып килаләр. Рудник ярты йыллыҡ планын 22 апрелгә тамамланы.

Коллектив темпты үҫтергәндән-үҫтерә бара. Начальнигы иптәш Максимов булған тау цехы үҙенең май алды йөкләмәһен 23 апрелгә үк үтәне. Коммунист Алексеев сменаһы горняктәрҙең социалистик ярыш инициативаһының башында тора. Ундарса забойщик, ике йөҙсәләп айлыҡ планды байтаҡ арттырып үтәне. Алдынғы забойщиктәр Миронов, Ғәббәсов, Ғәниев иптәштәр көн һайын бер ярым норма бирәләр. Смена мастеры Терегулов ял көнөндә Беренсе Май хөрмәтенә забойщик булып эшләп, үҙенең смена нормаһын 4516 процентҡа үтәне. Дробилка цехының коммунист Шайхисламов сменаһы стахановсы вахтаға баҫып, 20 апрелдә пландан тыш күп руда эшкәртте.

Учалы рудниғының горняктәре бөйөк байрам көнөнә ҙур производство еңеүҙәре менән килаләр.

М. Хәйҙаров.

Ярыш алдынғылары

Өфө «Техжирпром» тресының химия заводында ярыш көндән-көн киң ҡолас ала бара. Эшселәр беренсе майҙы алған йөкләмәләрен үтәп, производство уңыштары менән ҡаршылауға әҙерләнәләр. Ошо маҡсат менән коллектив стахановсы вахтаға баҫты. Апрель айының тәүге ун көнөндә завод айлыҡ пландың 38 процентын бирҙе.

Май алды социалистик ярышы алдынғылары, мисҡа яһаусы Антонов йыл башынан алып туғыҙ айлыҡ, эшсе Сибағатуллин һигеҙ ай ярымлыҡ, олиф ҡайнатыусы Ризванова һигеҙ айлыҡ норма үтәнеләр.

Бында эшселәрҙең 43 проценты һәр көн бер ярым-икешәр норма бирәләр.

Йәштәр беренселек өсөн көрәшәләр

Беренсе май байрамын достойн ҡаршылау өсөн киң йәйелдерелгән социалистик ярыш Өфө ҡалаһы Молотов исемендәге артель коллективында хеҙмәт күтәренкелеше тыуҙырҙы. Артелдең эшселәре бөйөк байрам көнөнә Башҡортостан ғалимдәр йортон йыһазлау өсөн мебелдәр етештереүҙе тамамлау өсөн көрәшә. Был йөкләмәне үтәүҙә Василий Даниловтың столярҙар бригадаһы коллективы хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт өлгөләре күрһәтә. Бригада, көндәлек графикте 250 процентҡа үтәп, артелдә беренселекте алып килә. Был бригаданың столяры иптәш Селезнев смена һайын өс норма бирә.

Иптәш Тимиров етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы социалистик ярышта икенсе урында бара. Бригада члендәре, май алды ярышында беренселекте алыу өсөн көрәшеп, апрелдең 20 көнлөк графигын ике тапҡырға арттырып үтәнеләр.

Эшсе йәштәр слеты

21 апрелдә Өфө эшсе йәштәренең слеты булып үтте. Унда ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретаре иптәш Чуватин «Комсомолдың 30 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярыш» тураһында доклад яһаны.

Докладсы комсомолецтарҙың, йәштәрҙең социалистик общество төҙөүҙә актив ҡатнашыуҙарын, һуғыштан һуңғы осорҙа халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү пландарын үтәүҙә көстәрен аямай эшләүҙәрен билдәләп үтте.

Ҡала йәштәре комсомолдың 30 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышҡа сыҡтылар. Предприятиеларҙа сырье, электр энергияһына, ағыулыҡҡа экономия яһау өсөн күп конкрет эштәр башҡарыла. Резина һәм паровоздар ремонтлау заводтары эшселәре производство эштәрен яҡшыртыуҙа айырыуса гүзәл өлгө күрһәтәләр.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа күп кенә иптәштәр сығып һөйләнеләр һәм даңлы Ленин — Сталин комсомолының 30 йыллығын достойн ҡаршылау өсөн конкрет йөкләмәләр алдылар. Электротехник заводтың алдынғы стахановсыһы иптәш Сәнтов комсомолдың 30 йыллығы хөрмәтенә 3 йыллыҡ норма үтәргә һүҙ бирҙе.

Паровоздар ремонтлау заводынан стахановсы Сидоров, телефон аппараттары заводынан Аҡбулатова иптәштәр сығыш яһап, үҙ коллективтәрендә комсомолдың 30 йыллығын производство еңеүҙәре менән ҡаршылау өсөн социалистик ярыш көндән-көн киңерәк ҡолас ала барыуын күрһәттеләр.

Паровоздар ремонтлау заводында 42 йыл эшләгән, Почёт Билдәһе ордены менән наградланған 68 йәшлек эшсе иптәш Алехин слетта ялҡынлы сығыш яһаны.

— Совет Хөкүмәте һәм иптәш Сталиндең, — тине ул, — беҙҙең кеүек эшсәндәр тураһында хәстәрлек күреүе арҡаһында беҙ бәхетле тормошта йәшәйбеҙ. Минең 6 балам бар. Улар бөтәһе лә уҡығандар һәм яуаплы постарҙа эшләйҙәр. Мин йәштәрҙе производствола һәр ваҡыт алдынғы сафта булырға саҡырам.

Слетта ҡатнашыусылар йәштәрҙең яҡын дуҫы иптәш Сталинға котлау телеграммаһы ҡабул иттеләр һәм ҡала комсомолының 30 йыллығына ҡәҙәр йыллыҡ планды үтәүҙе бурыс итеп ҡуйҙылар.

Т. Хөсәенов.

В. И. Ленин Әҫәрҙәренең ун бишенсе томы

В. И. Ленин Әҫәрҙәренең ун бишенсе томыңа уның 1908 йылдың мартынан алып 1909 йылдың авгусына тиклем яҙған хеҙмәттәре ингән.

Беренсе рус революцияһы еңелгәндән һуңғы йылдар Россия эшселәр синыфының марксистик партияһы өсөн ҡаты һынау булды. Столыпин реакцияһының ҡоторонған удары партия өҫтөнә ябырылды. Күп кенә ваҡ буржуаз юлдаштар партия сафтарын ташлап сыҡтылар. Меньшевиктар революцияны хурлыҡлы рәүештә ваз кистеләр. Улар пролетариаттың революцион партияһын юҡ итергә һәм Столыпин режимена ҡулайлашырға тырыштылар.

Ленин һәм Сталин тарафынан етәкселек ителгән большевиктар генә пролетариаттың марксистик партияһын ныҡытыуҙа дауам иттеләр һәм яңы һуғыштар өсөн, яңы революция өсөн көс йыйҙылар. «Ул саҡта,—тип билдәләне иптәш Сталин,—дөйөм ағымға эйәрмәүсе һәм партиялылыҡ байрағын юғары тотоусы берҙән-бер кеше Ленин булды. Ул партияның тарҡау һәм ҡыйратылған көстәрен ғәжәп сыҙамлылыҡ һәм иң киткес ныҡышмалылыҡ менән йыйҙы, эшселәр хәрәкәте эсендәге партияға ҡаршы бөтә һәм һәр төрлө ағымдарға ҡаршы көрәште, партиялылыҡты иң киткес батырлыҡ һәм күрелмәгән ныҡышмалылыҡ менән яҡланы. Билдәле, партиялылыҡ өсөн булған был бәхәстә һуңынан Ленин еңеүсе булып сыҡты» (6-сы том, 58—59-сы биттәр).

Реакция йылдарында В. И. Ленин тарафынан яҙылған әҫәрҙәр большевистик партиялылыҡ өсөн көрәш рухы менән һуғарылғандар. Был әҫәрҙәрҙә Лениндең партияға һәм эшселәр синыфына, революцияның еңәсәгенә ышаныуы асыҡ күренгән.

Реакция осоронда большевиктарҙың төп стратегик маҡсаты 1905 йылдағы кеүек үк царизмде ҡолатыуҙан, буржуаз-демократик революцияны аҙағына тиклем алып барып еткереүҙән, социалистик революцияға күсеүҙән торҙо.

Ләкин элекке стратегик маҡсат өсөн көрәш яңы шарттарҙа барҙы. 1905—1907 йылғы революция еңелгәндән һуң килеп тыуған тарихи шарттар партияның тактикаһын ҡайтанан ҡарауҙы талап иттеләр. Лениндең бөйөк хеҙмәте шунан тора: ул партияға артабанғы көрәштең асыҡ перспективаһын бирҙе һәм Столыпин реакцияһы шарттарында тактиканы эшләне.

15-се томға ингән күп кенә әҫәрҙәрендә («Тура юлға», «Рус революцияһының «тәбиғәте» тураһында», «Рус революцияһын баһалауға ҡарата», «Ағымдағы моментте баһалау тураһында», «Юлға», «Беҙҙең революцияла пролетариаттың көрәш маҡсаты» тигән һәм башҡа әҫәрҙәрендә) Ленин яңы обстановкаға марксистик тулы баһа бирҙе һәм үҙгәргән тарихи шарттарҙа партияның революцион тактикаһын нигеҙләне.

Большевиктар үҙҙәренең Тыуған иленең ысын патриоттары булып сығыш яһанылар. Ул саҡта Ленин: «Ватан, йәғни билдәле бер политик, культура һәм социаль среда пролетариаттың синфи көрәшендә иң ҡеүәтле фактор булып тора... Пролетариат үҙ көрәшенең политик, социаль һәм культура шарттарына айырмаһыҙ һәм тыныс ҡына ҡарай алмай, тимәк, уның өсөн үҙ иленең яҙмышы ла айырмаһыҙ була алмай» (171—172-се биттәр), тип яҙҙы.

Ул йылдарҙа Россия үҫештең ике юлы алдында тора ине. Столыпин крепостник-помещиктарҙың власен һәм өҫтөнлөктәрен һаҡлау интерестарында Россияны юғарынан тороп буржуаз үҫешкә юналдерергә, «Бисмарк Россияһын тыуҙырырға» тырышты. Ярым крепостниклек царизмдең буржуаз монархияға әүерелеүе юлында столыпинщина яңы аҙым булды. Буржуазия һәм уның партияһы — кадеттар царизм менән бергә хәрәкәт иттеләр. Уларға меньшевистик лакейҙар тырышып ярҙам иттеләр. Столыпин агенттарен Ленин ҡырҡҡа рәүештә фаш итте. Ул Россияның хеҙмәтсән массаларын иҫке тәртиптарҙе революция юлы менән емереү, царизмде ҡолатыу һәм крепостниклек ҡалдыҡтарын бөтөрөү өсөн, буржуаз-демократик революцияның тулыһынса еңеүе һәм артабан социалистик революцияға күсеүе өсөн көрәшкә саҡырҙы.

Ләкин Столыпин реакцияһы шарттарында массаларҙы самодержавиене туранан-тура штурмлауға саҡырыу мөмкин түгел ине. «Көн тәртибенә,—тип яҙҙы Ленин, — барынан элек пролетариаттың аңлы массаларын тәрбиәләү, ойоштороу һәм туплау буйынса оҙаҡ ваҡыттар эшләү бурысы ҡуйыла» (296-сы бит). Массаларҙы яңы революцияға әҙерләү интерестарында легаль мөмкинлектарҙе: Государство думаһын, профсоюздарҙы, кооперативтарҙе, больница кассаларын һәм башҡаларҙы бөтә саралар менән файҙаланырға кәрәк ине. Ленин партия ойошмаһы етәкселегендә легаль булмаған эште легаль эш менән бергә ҡушып алып барыуҙы талап итте. Ленин көстәрҙе һаҡлап алып ҡалыуға һәм ҡайтанан группалаштырыуға, яңы революцион һөжүмгә иҫәп ителгән бик яҡшы тактиканы эшләне.

Ленин партияны һәм эшселәр синыфын беренсе рус революцияһының героик традицияларына тоғролоҡ рухында тәрбиәләне. Был революцияға йомғаҡ яһап, Ленин меньшевиктарҙе ренегаттар һәм революциянан сигенеүселәр итеп фашланы. «Беҙ,—тип яҙҙы Ленин, — эшселәр партияһы массаларҙың туранан-тура революцион көрәшендә, 1905 йылғы октябрь һәм декабрь көрәшендә пролетариаттың Коммунанан һуңғы бик бөйөк хәрәкәттәрен күрә, революцияның буласаҡ уңыштарының залоғы көрәштең ошондай формаларының үҫеүендә ята, көрәштең был өлгөләре беҙгә көрәшселәрҙең яңы быуындарын тәрбиәләү эшендә маяҡ булып хеҙмәт итергә тейешле, тип асыҡтан-асыҡ һәм бөтә кеше ишетерлек итеп, икеләнеүселәрҙе һәм рухтары төшкән кешеләрҙе өйрәтерлек итеп, ренегатлыҡ итеүселәрҙе һәм социализмдан ситкә китеүселәрҙе хурлыҡҡа ҡалдырырлыҡ итеп белдерергә тейешбеҙ» (46—47-се биттәр).

Россияла буржуаз-демократик революцияның нигеҙен тәшкил иткән аграр мәсьәләне өйрәнеүгә Ленин айырыуса иғтибар бирҙе. Үҙенең күп кенә әҫәрҙәрендә («XIX быуаттың аҙағына Россияла аграр мәсьәлә», «Рус революцияһында социал-демократияның аграр программаһы. Автореферат», «П. Маслов истерикала», «Плеханов һәм уның компанияһы иҫке ревизионизмде яҡлайҙар» тигән һәм башҡа әҫәрҙәрендә) Ленин аграр мәсьәләлә марксистик теорияны һәм программаны эшләне, помещиктарҙың латифундияларын конфискациялау һәм крепостниклек ҡалдыҡтарын тулыһынса бөтөрөү һәм ауылда социализм өсөн көрәш юлын таҙартыуҙың берҙән-бер средствоһы булыуы йәһәтенән бөтә ерҙе национализациялау кәрәклеген эшләне.

Ленин тарафынан билдәләнгән революцион асыҡ перспектива һәм партияның уның тарафынан эшләнгән яңы тактикаһы революцияның буласаҡ еңеүен тәьмин иттеләр.

Пролетариат партияһының революцион линияһын билдәләп, Ленин ике фронтта, оппортунизмдең ике төрөнә ҡаршы: партияның туранан-тура дошмандары булған ликвидаторҙарға ҡаршы һәм уның йәшерен дошмандарына — отзовистар тип аталған дошмандарына ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барҙы.

Лениндең 15-се томға ингән әҫәрҙәренең байтаҡ өлөшө («Тура юлға», «РСДРП-ның бишенсе (дөйөм Россия) конференцияһы», «Юлға», «Германия социал-демократик эшселәр партияһының правлениеһенә», «Ликвидаторлыҡты бөтөрөү» тигән һәм башҡа әҫәрҙәре) меньшевик-ликвидаторҙарға ҡаршы көрәшкә арналған. Пролетариаттың революцион партияһының программаһынан һәм тактикаһынан хәбәхәт рәүештә баш тартҡан ликвидаторҙарҙы Ленин фаш итте. Ул ликвидаторлыҡтың ысын асылын тәрән рәүештә асып бирҙе: «Ликвидаторлыҡ һүҙҙең ысын мәғәнәһендә, — тип яҙҙы Ленин, — меньшевиктарҙың ликвидаторлығы, идея яғынан социалистик пролетариаттың революцион синфи көрәшен ғөмүмән инкар итеүҙән һәм, айырым алғанда, беҙҙең буржуаз-демократик революцияла пролетариаттың гегемонияһын инкар итеүҙән тора... Ойоштороу яғынан ликвидаторлыҡ легаль булмаған социал-демократик партиянан һәм уның менән бәйләнгән РСДРП-нан ваз кисеү, унан сығыу, уға ҡаршы көрәшеү тигән һүҙ...» (419-сы бит).

Ликвидаторҙар эшселәр синыфының үҙ көстәренә булған ышаныуын емерергә тырыштылар. Улар пролетариатты эксплоататор ҡорголошто юҡ итеү юлындағы еңелмәҫлек ҡыйынлыҡтар менән ҡурҡытырға маташтылар. Ликвидаторҙарҙы тар-мар итеп, Ленин эшселәрҙә рух күтәренкелеге, еңеүгә ышаныу тәрбиәләне. Ликвидаторҙарҙың Көнбайыш Европа социал-демократик партиялары алдында ҡолдарса теҙ сүгеүҙәренә ҡаршы Ленин дәрт менән көрәште. Ликвидаторҙар, тине Ленин, — «Партияны фракцияға ҡулайлаштырырға», уны II Интернационал партияларҙа һымаҡ парламент фракцияһының ҡушымтаһына әйләндерергә тырыштылар. Ленин менән Сталин эшселәр синыфының революцион партияһын, массалар менән тығыҙ бәйләнгән, царизмде һәм капитализмде штурмлауға уларҙы алып барырға булдыҡлы, яңы типтағы партияны төҙенеләр.

Иптәш Сталин үҙенең был осорҙағы хеҙмәттәрендә ликвидаторҙарҙы фаш итә һәм партияны ныҡытыуҙың асыҡ программаһын билдәләй. «Партия кризисе һәм беҙҙең бурыстарыбыҙ» тигән мәҡәләһендә ул, партия ойошмаларының бер-береһе менән бәйләнешен ныҡытыу һәм уларҙың массаларҙан айырылған булыуҙарын бөтөрөү өсөн партия үҙенең массаға булған идея йоғонтоһон ойоштороу саралары системаһы менән тулыландырырға тейеш, тип күрһәтә.

«Ошо бурыстарҙы хәл иткән хәлдә генә партия кризистан иҫән-һау һәм яңырып сыға ала, ошо шарттарҙы үтәгән хәлдә генә партия героик рус пролетариатының лайыҡлы авангарды роле ауаплылығын үҙ өҫтөнә ала ала» (Әҫәрҙәр, 2-се том, 157-се бит).

РСДРП-ның 1909 йыл ғинуарҙа булған V конференцияһы ликвидаторҙарҙы тар-мар итеүҙә бик ҙур роль уйнаны. Ленин был конференцияға ҙур әҙерлек эше үткәрҙе һәм унда төп докладсы булды. Томда баҫылып сыҡҡан материалдар Лениндең конференциялағы ролен асыҡ күрһәтәләр. РСДРП-ның Ленин тарафынан етәкселек ителгән V конференцияһы ликвидаторлыҡты ғәйепләне һәм яңы шарттарҙа партияның тактикаһын билдәләне.

Лениндең 15-се томға ингән күп кенә әҫәрҙәре («Ике хат айканлы», «Нәүбәттәге мәсьәләләргә ҡарата» мәҡәләһе айканлы, «Большевизмға карикатура», «Ликвидаторлыҡты бөтөрөү» һәм башҡалар) отзовистарға ҡаршы — үҙҙәренең оппортунизмен һул фразалар менән ышыҡлаусы отзовистарға ҡаршы көрәшкә арналғандар. Отзовистар, партияны легаль мөмкинлектарҙе файҙаланыуҙан баш тартыуға саҡырып һәм Государство думаһынан социал-демократ депутаттарҙы саҡырып алыуҙы талап итеп, партияның массалар менән бәйләнешен өҙҙәләр, был—партияны сектантлыҡ ойошмаһына әйләнеүгә, партияны юҡ итеүгә алып бара, тип күрһәтте Ленин. Ленин отзовистарҙе «ликвидаторҙарҙың тиҫкәре яғы» тип атаны. Отзовистарға ҡаршы көрәштә партия ленинизмдең иң мөһим принциптаренең берене — партияның массалар менән ҡаҡшамаҫ бәйләнешен һаҡлап алып ҡалды һәм ныҡытты. Большевиктар партияһының көсө һәм еңелмәҫлеге—ошо ленинсе принципта.

Большевистик «Пролетарий» газетаһы редакцияһының 1909 йыл июнда булған киңәйтелгән кәңәшмәһе отзовистарҙе тар-мар итеүҙә ҙур роль уйнаны. 15-се томда партияның дошмандарына ҡаршы Лениндең ҡыркка көрәшен асыҡ дәрәжәлә булып торған ленинсе документтар урынлаштырылғандар. Отзовистарҙе большевистик ойошманан сығарып, «Пролетарий» редакцияһының кәңәшмәһе пролетариаттың революцион партияһын ныҡытыу юлында мөһим маяҡ булды. Иптәш Сталин был кәңәшмәнең ҡарарҙарына тулыһынса булышлыҡ күрһәтте. Баку комитеты И. В. Сталиндең тәҡдиме буйынса резолюция ҡабул итте һәм унда «иптәш Ленин уның вәкиле булған редакция күпселегенең позицияһын ҡырҡа яҡлай» (Әҫәрҙәр, 2-се том, 166-сы бит).

Ленин партия өсөн барған көрәштә [illegible] асса бирҙе. Ул партия [illegible] идея асыҡлығы талап итте, һәр төрлө оппортунистик [illegible] талап итте. «Икенсе съезддан һуң бик мөһим һәм төп мәсьәләләр буйынса идея көрәшен [illegible] партия [illegible] талап итте. [illegible] Эшселәр—большевиктар [illegible] ҡырҡҡа өлгө бирергә һәм бер нә[illegible] илеә асыҡлыҡ, асыҡ ка-

раштар, принципиаль линия талап итергә тейештәр» (330-сы бит).

Ленин һәм Сталин большевиктар партияһын юғары принципиаллек һәм идеялылыҡ рухында тәрбиәләнеләр. Ошондай принципиаллектән һәм идеялылыҡтан башҡа, оппортунистарға ҡаршы көрәштән башҡа партия царизмде һәм капитализмде ҡолатыуға, социалистик общество төҙөүгә өлгәшә алмаған булыр ине.

Лениндең 15-се томға ингән әҫәрҙәре большевистик партиялылыҡтың, һуғышсанлыҡтың, килешмәүсәнлектең өлгөһө булып торалар. Столыпин реакцияһы йылдарында контрреволюция идеологик фронтында ла һөжүм итте. Буржуазия ялсылары марксизмға ҡаршы көслө поход алып барҙылар.

Ленин партияны үҙенең идея байлығын—марксизмде ныҡ һаҡларға саҡырҙы.

15-се томда Лениндең «Марксизм һәм ревизионизм» тигән, Маркстың үлеүенә 25 йыл тулыуы уңайы менән яҙған мәҡәләһе урынлаштырылған. Унда ревизионизмгә тәрән характеристика бирелгән һәм уның синфи тамырҙары асып һалынған. Ленин, эшселәр хәрәкәтендә марксизмдең еңеүе айҡанлы марксизмдең дошмандары үҙҙәренең көрәш ысулдарын үҙгәрттеләр, тип күрһәтә. Марксҡа «төҙәтеү», Маркстың «ҡайтанан ҡарауҙар», «Марксҡа ревизия яһау» һылтауы менән улар уның бөйөк учениеһенең революцион нигеҙҙәрен емерерге тырыштылар.

Ленин большевиктар партияһының теоретик нигеҙҙәрен яҡланы һәм байытты, марксизмде һәр төрлө оппортунистик боҙоуҙарға ҡаршы бик ҡаты көрәште.

Лениндең күп кенә мәҡәләләре («Донъя политикаһында яғыулыҡ материалы», «Балкандағы һәм Персиялағы ваҡиғалар», «Батшаның Европаға һәм ҡара груһсы Думаның ҡайһы бер депутаттарының Англияға барыуҙары» һәм башҡалар) халыҡ-ара хәлгә анализ яһауға арналғандар. Уларҙа, донъяла ике лагерь: революция, демократия, прогресс лагере һәм реакция лагере барлыҡҡа килә, тип күрһәтелә. Рус революцияһы көстәре, Европа пролетарийҙәре, көнсығыштың колониаль халыҡтары беренсе лагерҙе тәшкил итәләр, Икенсе лагерға халыҡ-ара буржуазия етәкселек итә.

Ленин Европа буржуазияһына үҙенең власен, үҙенең милкәтен, үҙенең доходтарын һаҡлап ҡалыу өсөн һис бер төрлө ҡуызлыҡтар алдында ла туҡталып ҡалмаған реакцион көс, тип характеристика бирә. «Үҙенең өйөндә эшселәр хәрәкәтенең үҫеүенә асыуы ҡабарған, Индияла революцион көрәштең күтәрелеүенән ҡурҡҡан Англия либераль буржуалары эшсе массаларҙың көрәшен капиталға ҡаршы, капиталистик колониаль системаға, ғөмүмән ҡол итеү, талау һәм кеҫлөү(?)гә ҡаршы уятыуға барып еткән Европаның иң «цивилизациялы», конституционализмдең иң юғары мәктәбен үтәгән политик «деятелдәренең» ниндәй йыртҡыс булып әүерелгәнлектәрен һаман йышыраҡ, һаман асыҡыраҡ, һаман кискенерәк күрһәтәләр» (159—160-сы биттәр). Лениндең был асыулы һүҙҙәре беҙҙең көндәрҙә лә тиклем әһәмиәтле булып яңғырайҙар.

* * *

В. И. Ленин Әҫәрҙәренең 15-се томына ингән хеҙмәттәр өйрәнеү кадрҙарҙы большевиктар партияһының героик традициялары рухында, партиялылыҡ, идеялылыҡ, теоретик килешмәүсәнлек, ленинсе принципиаллек рухында тәрбиәләү өсөн [illegible] массаларҙа большевиктар етәкселек итеүсе [illegible] менән ҡоралландыра.

М. ВОЛИН.

(«Культура и жизнь» газетаһынан).

Өлгәшелгән уңыштарҙы ныҡытыу өсөн көрәшмәйҙәр

«Путь Ленина» колхозының партия ойошмаһы үткән йыл колхозсылар араһында агитацион-массовый эште киң йәйелдерҙе. Уларҙы юғары урожай өсөн көрәшкә мобилизацияланы. Был эштә байтаҡ уңыштарға өлгәшелде. [illegible] колхоз юғары урожай үҫтереп алды һәм государствоға иген [illegible] колхозсыларҙың хеҙмәт көнөнә [illegible] килограмм иген бүленде. Ул ваҡыттарҙа 28 агитатор [illegible] агитаторҙар өсөн ваҡытында семинарҙар үткәрелде.

Ләкин партия ойошмаһы ошо уңыштарҙы ныҡытып, колхозсыларҙы быйыл тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәшкә мобилизациялау итәһе урында, ул өлгәшелгәндәр менән тынысланып ҡалды. Урындағы Советтарға һайлауҙар үткәндән бирле агитаторҙар колхозсылар араһында бер генә беседа ла үткәрмәгәндәр. Агитколлектив етәксеһе коммунист иптәш Шарипов агитаторҙарға етәкселек итеү эшен [illegible]. Партия ойошмаһы [illegible] колхоз партия ойошмаһы [illegible] колхозсыларҙы мобилизацияларға бурыслы.

С. Сәғитов.

Бөрө районы.

Советтәр Союзында

Киев. Украин ССР-ы Верховный Советының ултырыштар бинаһы яңыйы бастырылды. Г. Угринович фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

В. И. Ленин уҡыған ерҙә

ҠАЗАН. (ТАСС). Ҡазан государство университетендә Ленин аудиторияһы асылды. Ул хеҙмәтсәндәр араһында ҙур популярлек менән файҙалана. Бында Советтәр Союзының төрлө ҡалаларынан килгән-меңләгән студенттәр, уҡыусылар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр, Совет Армияһы воиндәре, ғилми работниктәр булдылар.

Ленин аудиторияһында В. И. Лениндең тормошо һәм революцион эшмәкәрлеге тураһында беседалар һәм консультациялар үткәрелә.

Инженерҙең лицевой счеты

ЛЕНИНГРАД. (ТАСС). Киров исемендәге заводтың 135 инженере биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүҙә коллективҡа ярҙам итеү йөкләмәһен алып, лицевой счеттар астылар. Улар үҙҙәренең йөкләмәләрен үтәп, производство техникаһына яңылыҡтар индерәләр һәм эшләп сығарыуҙа юғалтыуҙарҙы аҙайталар.

Инженер Пассинский, технологтар Серов һәм Полетаевтар бер ҙур деталде эшләп сығарыуҙы еңеләйтереү өҫтөндә эшләйҙәр. Улар сүкеп эшләү технологияһын үҙгәрттеләр. Быйыл һөҙөмтәһендә деталдең заготовкаһының ауырлығы 320 килограмға еңеләйтелде.

Инженер-технолог Сомов механик цехтың яуаплы деталде эшкәртеү линияһын тәҙәтте, был хеҙмәтләндереүселәрҙән һигеҙ кешене башҡа эшкә бушатырға мөмкинлек бирҙе. Технолог-новатор ҙур участкала изделиеларҙы шымартыу, ялтыратыуҙы механизацияланы. Быға тиклем ул ҡул менән эшләнә ине. Ул быйын өсөн махсус станокты файҙаланды, яңы инструмент менән эшләүҙе индерҙе һәм технологик процесте ҡайтанан ҡарап сыҡты. Механик эшкәртеүҙең срогы ныҡ ҡыҫҡарҙы. Завод был индерелгән яңылыҡтарҙан бер нисә йөҙ мең һумдарға экономия аласаҡ.

9 майҙа ҡояш тотоласаҡ

9 майҙа ҡояш тотоласаҡ. Уның тулы тотолоуы Советтәр Союзының көнсығыш ситтәренә яҡын ерҙәрҙә һәм Куриль утрауҙарында буласаҡ. СССР территорияһында ҡояш тотолоу тулыһынса күренмәйәсәк.

Владивостокта ҡояштың ундан туғыҙ өлөшөн ай ҡаплағаны күренәсәк. Бында ҡояш тотолоу, Мәскәү ваҡыты менән 4 сәғәттә 8 минуттан башланып, 7 сәғәттә бөтәсәк. Көньяҡ Сахалинда ҡояштың йөҙҙән биш өлөшө генә ай менән ҡапланмай ҡаласаҡ.

Көнбайышҡа барған һайын ҡояш тотолоуҙың күренеүе аҙая бара. Мәҫәлән, Новосибирскиҙа — ҡояш тотолоу 4 сәғәттә 29 минуттан 5 сәғәттә 48 минутҡа тиклем дауам иткән ерҙә ай ҡояштың ундан ике өлөшөн ҡаплағаны күренәсәк. Куйбышевта ай ҡояштың тик бер ситен генә ҡаплағаны күренәсәк. Кавказда, көн аяҙ булһа, ҡояш тотолоу, ҡояш сыҡҡанға тиклем булғанлыҡтан, тик ҡояш тотолоу бөткән ваҡытына күренәсәк.

Ҡояш тотолоуҙы фәнни күҙәтеү илдең бер-нисә урынында алып барыласаҡ. (ТАСС).

Хәниф Кәрим

Ҡәҙерле ҡунаҡ

«Уның йөрәге ҡанатлы. Шуға ул ваҡытты ла ҡыуып уҙа...»
(Заводта ишетелгән һүҙҙәр)

Байрамса биҙәлгән өйҙә
Балҡ итеп уттар яна.
Йыйылған дуҫтар, ҡәрҙәштәр,
Гөр килеп мәжлес бара.
Бары ла шат һәм бәхетле
Күр йәшлек шау-шыуында.
Һый-хөрмәт ашҡан саманан,
Һәр нәмә үҙ урынында...

Тик хужа бер аҙ бойоҡ
Нәмә етмәй? Нәмә юҡ?
Һаман килмәй бер ҡунаҡ!
Белмәйҙәр: нинә оҙаҡ?
Сәғәткә ҡарай хужа,
Һәм бер аҙ эсе поша:
— Күнмәй Солтан әҙәпкә...
Һуңланы өс сәғәткә! —
Кемдер әйтә:
— Ғәжәп эш...
Һесынлап, әллә юҡ.
Беҙҙең күркәм табынға
Ул хаҡһыҙ һуңлап йөрәй... —
Ни булды был Солтанға?
Әллә ҡуйҙымы сирләп?
Әллә мартен янында
Эшләйме һаман тирләп?... —

Мәжлес тамам булып килә,
Яңғырай һуңғы тостар.
Хужаға күп рәхмәт әйтеп,
Таралып тиҙҙән дуҫтар...
Быня һуңғы бокалдар ҙа
Яҡынлай ирендәргә.
Кемдер күҙ ҙә ташлап ҡуя
Сөйҙәге кейемләргә...
Шул саҡ ишек асыла...
Көткән ҡунаҡ — ҡаршыла!
Был инде — беҙҙең Солтан —
Дан мастер, ҡайнар цехтан...
Ғәҙәтсә ул сәләм бирә,
Ғәфү үтенә шунан,
Һәм әйтә һуңғы көндәрҙә
Сыҡмай эшләүен цехтан.
Шунда дуҫтар ҙур шатлыҡлы
Яңы хәбәрҙе белә:

Ул инде биш йыл нормаһын
Тултырып ҡайтып килә
Асыла мәжлеста уның
Нигә оҙаҡ булмауы:
Биш йыл алға китер өсөн
Өс сәғәткә һуңлауы...
Ул һөйләй
Мартен цехында
Яңып ҡорос ҡойоуын,
Һәм металл өсөн һуғышта
Яңы рекорд ҡуйыуын...
Билгеле, ҡорос — хазина:
Һынмаҫ ҡылыс ҡындарҙа,
Йә ул, яңы трактор булып,
Шаулар иркен ҡырҙарҙа.
Йә ул, сибәр күпер булып,
Ташҡын аша һуҙыла,
Ҡарап булып, юлдар һыҙа
Һыуыҡ полюс боҙонда...

Дуҫтар
Һуңлап килеүсене
Хаҡлы ғәфү итәләр:
Сөнки иң ҙур һыкалыуҙа
Һуңламауын беләләр.
Хужаның да йөҙә асыҡ,
Балҡып тора шатлыҡтан.
— Дуҫтар, мәжлес тамам
тулы!
Тип ҡуя ул аҡтыҡтан.

Солтанды урап алалар,
Ултырталар иң түрҙән,
Батырҙы ҙурлап, тантана
Башлаһып кита тиҙҙән.
Дан яуа ихлас күңелдән
Сафта аллын кешегә,
Һәм уның ватан аҙымын
Тиҙләтеүсе эшенә.

Мин дә ҡушам тауышымды!
Дан шуға —
Кем ашыға:
Коммунизм ҡырҙарына
Кем алдан барып сыға!

Февраль, 1948.

Юғары урожай мастерҙарының тәжрибәләрен уртаклашыу

Сәсеү нормаларын дөрөҫ кулланыу урожайҙы күтәрә

Сәсеү нормаларын дөрөҫ куллана белеү юғары урожай алыуҙа иң мөһим шарттарҙың береһе булып тора. Быны күп тәжрибәләр һәм алдынғыларҙың практикаһы дөрөҫләй.

Дәүләкән районы «1 Май» колхозының баҫыусылык бригадаһы бригадиры, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш А. В. Стоянов дөрөҫ сәсеү нормаһының әһәмиәте турында былай ти:

— Үҙгән йыл минең бригадам 28,1 гектар участкаһың һәр бер гектарынан 31,86 центнер бойҙай урожайы алды. Быңдай юғары урожай алыуҙа бер дөрөҫ сәсеү нормаһы кулланыу, минеңсә, бик ҙур роль уйнаны. Беҙгә һәр бер гектарға сәсеү өсөн 130 килограмм норма тәкдим ителгәйне. Беҙ тупраҡтың баҙыулығы һәм орлоктоң сығыуы һәм ерҙә уҙын запас кул булыуҙы иҫкә алып, 130 килограмм урынына, 140 килограмм орлок сәстек. Участканың һәр бер квадрат сантиметр ерен тулыһынса файҙаланыу өсөн калған буш урындарға алдан ишеттереп орлоктарҙы кул менән кумеп сыктык.

Бакалы районы «Красный пахарь» колхозының орденле звеноһы А. Москвина арҡылы-буй юл менән һәм һәр бер гектарға 180 килограмм орлок сәсеп, ике һәр бер гектарынан 2,2 центнер артыҡ бойҙай урожайы алды. Быңдай миҫалдар бик күп. Урожай мастерҙәре былай ҙа участкаҙы агротехника кимәлено һәм орлок сифатына карап, бер иксә тирәйе сәсеү нормаһы кулланасаҡтар.

Бураҫ быйылғы яҙғы сәсеүҙе һшо тәжрибәләргә таяныр үткәреү бер һәм үҙгән йылғы тупаҫ хаталарҙы кабатламаҫтар тора.

Үҙгән йыл сәсеү нормаһын кулланыу буйынса бик үҙ хаталар булыуын һәм улар урожайҙың түбән булыуына килтерҙе. Благовар районы «Новый путь» һәм «Красный украинец» колхоздарында бойҙай орлоктоң сәсеү нормаһы үҫәме ығынан «ерена еткерелеп», гектарға 130 килограмм иҫәбенән сәселде. Ләкин был орлоктарҙың сығышы 50 процент кенә ине, шуға ҡарамаҫтан, 130 килограмға кәрәкле төҙәтмә индерелмәне. Һөҙөмтәлә бер гектарға 130 килограмм орлоҡ түгел, ә шыта алырлыҡ 65 килограмм орлоҡ ҡына сәселде һәм һәр бер гектарҙан... 100 килограмм «урожай» алынды.

Был хәлде үҙгән йыл Аскын, Дүртөйлө, Өфө, Әлшәй һәм башка күп кенә райондарҙа ла осратырға тура килде.

Быйыл һәр бер район өсөн күп тәжрибәләрҙән һәм алдынғыларҙың практикаһынан сығып тәҙәлгән сәсеү нормалары тәкдим ителде. Ауыл хужалығы шарттары бик сыуалсы. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш А. В. Стояновтың тәкдиме һәр бер булектәре был нормаларҙы, конкретлаштерелгән хәлдә, айырым колхоздарға еткерҙеләр. Һуҙ һәр бер колхозға еткерелгән ана ошо өлгә нормаларҙа тағы ла конкретлаштереү кәрәклеге турыһында барып.

Быға тиклем күпселек колхоздар районнан бирелгән сәсеү нормаһын һис бер үҙгәртеүһеҙ сәсеп килделәр. Был хата практикаға тыбылыуы һәр бер урып булырға тейеш түгел. Беҙҙең Башҡортостандың тәбиғи-тупраҡ-климат шарттары бик сыуалсы. Район кұләмендә генә түгел, балки һәр бер колхозда тейерлек урмандар, ялан, тау бите, һыу буйҙары баҫыуҙары бар. Һәр баҫыуҙа тупраҡ үҙенсәлеге. Ошо микроклимат шарттарында ашылыктар төрлөсә үҫтерер. Һыу булғанда баҫыуҙа дым да күберәк, тупраҡ та яҡшы һәм быныҡ та була. Тау битендәге, йәки калҡыулыктағы баҫыуҙа тупраҡ насарыраҡ, налкынныраҡ һәм корорак була. Был шарттарҙы иҫкә алып, колхоз, һис булмаҫа, бер үк культура булә ла тағы ителә. Ерҙә культура был баҫыуҙа бер һәм ерҙә бер ыңғайы, һис булмаһа, бер үк культура булһа ла, хәсәҙән баҫыуҙа сәсеү нормаһы кулланылырға тейеш.

Сәсеүҙең беренсе көндәрендә орлоктарҙы ниргәләргә һәм һайырлар кумәргән, һуңғы көндәрҙә куйыраҡ сәсеү һорауҙар. Орлоктарҙы ниргәләргә һәм һайырлар ниргәләрҙә куйыраҡ, тамаша итеп сәсергә кәрәк.

Орлоктарҙың ниргә һәм һайыраға еттелә ябыҡ сәселгән ергә, тыңға һерәләр ерге карағанда куйыраҡ сәсергә кәрәк. Орлок эре булһа ла был юлғы куйыраҡ сәсергә кәрәк.

Бөтәһе культураларҙы арҡылы-буй юл менән сәскәндә, сәсеү нормаһын 15—25 процентҡа артыҡыраҡ итеп алырға тура килә.

Был агротехник талаптар еҫтән карағанда бик ябай талаптар. Ләкин улар күп кенә урмындарҙа үтәлмәйҙәр. Һәр бер участканың үҙенсәлегенә карата кулланылған конкретләштерелгән сәсеү нормалары урожайҙы күтәреүгә бик нык ярҙам итәләр.

В. Ғирфанов.

Башҡортостан баҫыуҙыҡ тәжрибә станцияһының агротехника бүлеге мөдире.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланған М. В. Ивонов — Балтас районы Куйбышев исемендәге колхоздың председателе. Ул етәкселек иткән колхоз 1947 йылда 40 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,9-ар центнер арыш урожайы алды.

Баҫыуға сыктылар

АСКАР. (Телефон аша). Әбйәлил районы «Серп» исемендәге колхозында Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене кавалеры иптәш Селиванов бригадаһы беренсе тош Селиванов бригадаһы беренсе булып баҫыуға эшкә сыкты. Бригадаларҙы бөтә звенолар ҙа үҙ участкаларында ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә азыҡландырыуҙы үткәрҙеләр. Иптәш Еремеев звеноһы ике көн эсендә 14 гектар ужым сәсеүлеген азыҡландырҙы. Был звено быйыл 20 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай үҫтерергә йөкләмә алып, иптәш Селиванов звеноны менән социалистик ярыштар сыкты.

Иптәш Селиванов үҙгән йыл звеноларҙын эше менән оператив етәкселек итеү, колхозсылар араһында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, алдынғыларҙың эш тәжрибәһен кин кулланыу һөҙөмтәһендә урожайҙы арттырыуға ҙур уңышһына өлгәшеү, һәр бер гектарынан 20,2-шар центнер урожай алды. Ул быйыл шул уҡ майҙандың һәр бер гектарынан 25-әр центнер урожай алыу, яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн көрәшә.

—☆—

Ужым сәсеүлектәренә — хәстәрле тәрбиә

Өфө районының 30 колхозында яҙғы баҫыу эштәре башланды. «Труд» колхозы члендәре ужым сәсеүлектәрен азыҡландырыуға беренсе булып башланылар. План буйынса 12 гектар урынына, 50 гектар ужым сәсеүлеге азыҡландырылды. Уварова һәм Кириллова иптәштәрҙең звенолары был эштә алда баралар.

«Парижская коммуна» ауыл хужалығы артеле члендәре лә ужым сәсеүлектәре тураһында ҙур хәстәрлек күрәләр. Колхоз ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә азыҡландырыу планын арттырып үтәне. Татьяна Белоусова звеноһы был эште беренсе булып тамамланы. Ул һәр бер гектарҙы 1-әр центнер сульфат аммонияһы һәм 6-шар центнер көл тиҙәге менән азыҡландырҙы.

Быйыл Өфө районы колхоздары 1200 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә азыҡландырыу һәм күп кенә майҙанда тырматыу үткәрәсәктәр.

Совхоз баҫыуҙарында

Раевка бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективе СССР Верховный Советы Президиумының 2 апрель Указдарына эш менән яуап бирә. Совхоз бүлексәләрендә баҫыуҙарҙа тәүге эштәр башланды инде. Линда бүлексәһе коллективе 2 көн эсендә 75 гектар майҙанда яҙғы ҡар һыуҙарын тотоу сараһын үткәрҙе. Совхоз буйынса бөтәһе 2005 гектар майҙанда ҡар һыуы тотолдо, 180 гектар майҙанда ужымдар өҫтәмә азыҡландырылды.

Сәсеү орлоктарын ағыулау эше ҡыҙыу бара. Дим һәм Линда бүлексәләрендә инде 500 центнер бойҙай ағыуланды.

Баҫыу эшен йәйелдереү өсөн совхозда бөтәһе лә әҙер. 12 трактор һәм тағылма инвентарҙар сифатлы итеп ремонтланған. Совхоз шулай уҡ март айында яңы 6 трактор алды һәм ошо көндәрҙә тағы ла 5 трактор ала.

Коллектив быйыл сәсеү майҙанын 5092 гектарға арттырып, бөтәһе 11.424 гектар игеп һәм шул иҫәптә 4.350 гектар бойҙай сәсә.

Ғ. Ғәйнетдинова.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Дим станцияһын әҙәклектән сығарырға

Дим станцияһы коллективенең аныҡ эшләүе Куйбышев исемендәге тимер юлдың эшмәкәрлегендә ҙур әһәмиәт тота һәм Көньяҡ-Урал тимер юлының эшенә лә шул йөгонто яһай.

Ләкин коллектив үҙенә йөкмәтелгән яуаплы бурыстарҙы сиктән тыш насар үтәй. Эште ойоштороуҙа юҡлык һиҙелмәй, хеҙмәт дисциплинаһы йомшаҡ. Уның күрһәтеүе өсөн апрель айының һуңғы яртыһында булған бер-ике көн аҙағында ғына... Был көндә манёврсы дежур диспетчер Мытарев һәм станция дежурныйы Кривенко иптәштәрҙең сменаһы эшселәре иргәнгә 3 сәғәттә бер составты паркта алып киттеләр. Сменщик Кондратьев поезды тиҙ жыуыуҙа бик тиҙ тиҙләткән...

...

Был хәлдең иң кәрәкле ҙур урынлы... Мытарев иптәш...

—☆—

Тимер юлдың Өфө бүлексәһе һәм Дим станцияһы етәкселәренә партияның өлкә конференцияһы талап иткәненсә, эште яҡшыртыу, йәшәп килгән серьез етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, станцияны әҙәклектән сығарыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә, большевистик ныҡышмалылыҡ менән эшләргә ваҡыт инде.

М. Кәримов.
С. Мәүлютов.

Редакцияға хаттар

Белорет—Миндәк юлын кем төҙәтергә тейеш

Учалы районын Челябе өлкәһе һәм Магнитогорск промышленность үҙәктәре менән тоташтырыусы Белорет—Миндәк юлы, ремонт үткәрелмәү арҡаһында, һуңғы йылдарҙа айырыуса насарланды. Хәҙер был араны автомашина менән үткәндә күп ыҙа сигергә тура килә. Сөнки, юл насар булған кеүек, бындағы күперҙәр ҙә ватылып, туҙып бөткәндәр.

Учалы районының юл төҙөү бүлеге мөдире иптәш Каледин — «ул юлды Белорет район юл төҙөү бүлеге төҙәтергә тейеш» — ти. Ә Белоретта — «...Учалы төҙәтһен» — тиҙәр.

Был хәл, Белорет һәм Магнитогорск ҡалалары менән Миндәк рудлигенең экономик бәйләнешен бөтөнләй өҙөүгә алып бара.

М. Байгилдин.
Р. Ғәрипов.

—☆—

Пенсия аҡсаларын ала алмайҙар

Маҡар район связь контораһының Әрмет ауылындағы агентствоһында эшләүсе Иәғфәр Иәһүдин пенсия аҡсаларын ваҡытында тапшырмай.

Ошо арҡала Мәрьйәм Нуркаева һәм Өммиҙур Зәйнуллина иптәштәр (Әрмет-рәхим ауылында тороусылар) пенсия аҡсаларын 1947 йылдың декабрь айынан бирле ала алмайҙар.

Иәһүдин аҡса тураһында был иптәштәр менән һөйләшергә лә теләмәй. Нуркаева иптәшкә — «216 һум аҡса өсөн баш ҡаңғыртып йөрөмә. Ҡасан аҡса булыр шунда алырһың» тип, тупаҫ яуап бирә.

Район Советы исполкомы был хәлгә иғтибар итер һәм Иәһүдинде тәртипкә саҡырыр тип ышанабыҙ.

Уҡытыусы Д. Б. Булатов.

—☆—

Ижади эшкә түбәнге эшселәрҙе күберәк ылыҡтырырға

Беренсе бораулау конторанының ҡатмарлы эштәр алып барыусы инженеры иптәш Салов скважиналарҙағы бораулау торбаларын һыуып таҙартыу буйынса күп кенә ҡиммәтле рационализаторлыҡ тәкдимдәр индерҙе. Ошо тәкдимдәрҙе тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә генә контора йылына 174 мең һум экономия алды.

Вышкалар төҙөлөшө прорабы Еремеев моторлы ике редукторға металл фундамент ҡороуҙы тәкдим итте. Тәкдимде һыҡап ҡарау ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе һәм ул хәҙер күп буровойҙарҙа ҡулланыла инде. Уларҙан алынған экономия 30 мең һум самаһы тәшкил итте.

Рационализаторҙар һәм уйлап сығарыусылар менән ижади эште яҡшы ойоштороу арҡаһында ла «Туймазынефть» трестының беренсе номерлы бораулау конторанһы үткән йылда производствоға 14 тәкдим индереп, ярты миллион һумдан артығыраҡ экономия алды. Контораның етәкселәре рационализаторҙарға ижади фекерҙәрен үҫтереү өсөн бөтә яҡлап ярҙам күрһәтә. Темалар тәҙалә, тәкдимдәрҙе эшләүҙә, чертежларҙы төҙөүҙә, өлгөләрен әҙерләүҙә практик булышлыҡ ителә.

Трестың автотранспорт контораһы рационализаторҙары һәм уйлап сығарыусылары ла бораулаусыларҙан ҡалышмайҙар. Ковлер, Недоспасов, Толочков, Боголомов һәм башҡа күп кенә иптәштәр тарафынан индерелгән рационализаторлыҡ тәкдимдәренән 100 мең һум файҙа алынды.

Стюф, Рябова иптәштәр скважиналарҙы парафиндән таҙартыу өҫтөндә уңышлы ғына эш алып баралар. Мәҫәлән, иптәш Стюф скважиналарҙа хасил булған парафиндарҙы алыу өсөн автоматик таҙартҡыс (скреб) тәкдим итте. Уның камиллаштерелеп эшләнгән өлгөһө һынау ваҡытында ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Работниктарҙың байтаҡ өлөшө башлыса производствоны рационаллаштырыу, буровойҙар төҙөлөше мәсьәләһе, йәшәп килгән станоктарҙың һәм агрегаттарҙың эшен һәм төрлө деталдәрҙе етештереүҙең технологик процестарын яҡшыртыу, бораулауҙа торбаларҙы төшөрөү-күтәреү операцияларын тиҙләтеү мәсьәләләре өҫтөндә эшләйҙәр.

Ләкин «Туймазынефть» трестында экспериментал мастерскойҙың юҡлығы рационализаторҙарҙың һәм уйлап сығарыусыларҙың эшендә серьез ҡамасаулыҡ булып килә. Механик-ремонт базаһының был эштәрҙе башҡарырға бөтөнләй мөмкинлеге юҡ.

Икенсе ҙур етешһеҙлек итеп рационализаторлыҡ эшенә эшселәрҙең бик аҙ өлөшө генә ылыҡтырылыуын күрһәтергә кәрәк. Был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә һис һүҙһеҙ практик саралар күрелергә тейеш.

А. Сатинова,
Октябрьск ҡалаһы.

Һал ағыҙыуҙы уңышлы үткәрергә

Көньяҡтың йылғаларында ағасты һаллап ағыҙа башланылар инде. Тәүге йөҙҙәрсә мең кубометр ағас йылғаларға төшерелде. Балтик буйы, Белоруссия һәм Украина йылғаларында ҡыҙыу эш осоро башлана. Төньяҡ, Урал һәм Көнсығыштың төп ағас әҙерләү райондарында навигация башланыуына һанаулы ғына көндәр ҡалды.

1948 йыл навигацияһында һал ағыҙыу һуғышҡа тиклемге кимәлгә етергә, ә Ҡама, Вятка, Печора, Волга, Ағиҙел, Мәскәү-Ока һәм Днепр бассейндарендә хатта ул кимәлдән артып китергә тейеш. Әҙерләнгән ағастың төп массаһын яҙғы ташҡын менән үк магистраль йылғаларға һаллап ағыҙыу һәм буксирҙар менән ташыу өсөн йылға флоты пароходствоһына тапшырыу бурысы тора. Навигация планы буйынса һаллап ташыла торған ағастың 40 проценттан күберәген потребителдәргә һыуҙың ташҡын осоронда оҙатырға кәрәк. Ҡама йылғаһының юғарғы ағымында һәм ҡушылған йылғалар ағымында әҙерләнгән ағастар Ҡама—Волга магистрале Молотов өлкәһенең ҡағыҙ комбинатына, Волганың түбән ағымында Донбасс өсөн шахталар терәүенә, төҙөлөш ағастары—Сталинградҡа, Закавказье һәм Урта Азия республикаларына китәсәк.

Миллиондарса кубометр ағас Төньяҡ Двина йылғаһы буйынса Архангельск ҡалаһының таҡта ярыу заводтарына оҙатыласаҡ. Төҙөлөш ағастарының байтаҡ өлөше Днепр йылғаһы бассейне буйынса Украина ҡалаларына һәм ауылдарына оҙатыласаҡ.

Һалсыларға государство әһәмиәтендәге мөһим бурыс йөкмәтелгән. Илгә күберәк ағас бирергә — был, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәү эшен тиҙләтеү тигән һүҙ. Һалсылар ағасты һаллап ағыҙыу пландарын тулыһынса үтәргә һәм күмер промышленноҫен, транспортты, целлюлоза-ҡағыҙ промышленноҫен, ауыл хужалығы машиналары төҙөлөшөн, таҡта ярыу заводтарын, яңы төҙөлөштәрҙе ағас менән тәьмин итергә тейештәр.

Алдынғы коллективтар ағас әҙерләү һәм ташыу пландарын сроғынан алда үтәнеләр. Ләкин айырым райондарҙа һал ағыҙыу пункттарына ағас ташыу юл ҡуйғыһыҙ рәүештә артта ҡала.

Ағас әҙерләү һәм ташыу эшен тиҙләтеп, йылғалар асылыу сроктарының ҡасан булыуына ҡарамаҫтан, һал ағыҙыуға әҙерлекте һис кисекмәҫтән тамамларға кәрәк. Бының өсөн ташылған бөтә ағасты һаллау өсөн ҡабул итергә, һалдарға, флотты, механизмле һәм торлавтарҙы ремонтлау планын үтәргә кәрәк.

Яңы бөндәр төҙөү һәм булғандарын ремонтлау, йылғаларҙын ярҙарын ҡарталау — һал ағыҙыу предприятиеләренең мөһим эше. Был һал ағыҙыуҙы юғалтыуһыҙ үткәрергә һәм ағастарҙы билдәләнгән пункттарына ҡыҫҡа сроктарҙа илтеп еткерергә мөмкинлек бирәсәк.

Ағастарҙы ҡышҡы осорҙа — навигация осороңа тиклем һаллау мөһим әһәмиәткә эйә булып тора. Сөнки йылғаларҙа һыу күп саҡта йәйге осорға ҡарағанда, һал менән килтерелгән ағастарҙы ике тапҡырға күберәк күләмдә тейәй алалар.

Башҡорт республикаһының Тайып леспромхозы һәм Чумар һал ағыҙыу конторанһы етәкселәре план буйынса билдәләнгән 35 мең кубометр урынына тик мең кубометр ғына ағас һаллаңылар. Бында һал ағыҙыуға әҙерләнеүгә ҡарағанда ағас әҙерләү эшен күп яҡшы башҡарҙылар һәм ағас ҡырҡыусыларҙың үҙ-үҙҙәрен аямай һалған хеҙмәттәре маҡсатҡа өлгәшмәй ҡалыу—ағастың һал менән ағыҙыуға үҙ ваҡытында эләкмәй ҡалыу ваҡиғаһы булырға мөмкин.

Ваҡ йылғаларҙа ағас ағыҙыуға айырыуса иғтибар бирелергә тейеш. Бында һәр бер көн генә түгел, һәр бер сәғәт ҡиммәт. Был йылғаларҙа ағас ағыҙыу боҙ китеү менән үк башланып, 10—20 көн эсендә тулыһынса тамамлана. Юл төшәү менән ағас ташыуҙы артабан дауам иттереү һәм төҙөлөш эштәрен башлау өсөн беренсе башлап һал ағыҙыуҙы үткәреүсе леспромхоздарҙағы бөтә эшселәрҙе һәм инженер-техник работниктарҙы мобилизовать итергә кәрәк.

Партия һәм хөкүмәт һал ағыҙыу эшен механизациялауға ҙур әһәмиәт бирәләр. Урман промышленноҫе яңы һаллау станоктары, тейәү-бушатыу машиналары һәм башҡа машиналар алды һәм ала. Техник процестарҙы артабан камиллаштереү, механизация индереү — хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙә бик мөһим бурыс булып тора. Техниканы максималь эффектле файҙаланыу, уҡан ул биреүгә мөмкин булғандың бөтәһен һығып алыу — һал ағыҙыусыларҙың намыҫ бурысы.

Һал ағыҙыу эштәрен комплексле механизациялауға күсерергә кәрәк. Ағасты ярҙан һыуға төшөрөүҙән, ҡыуғындан, рейд эштәренән башлап, ағасты илтеп еткереү пункттарына тиклем булған эштәр, ҙур производство конвейерендәге кеүек, бөтәһе лә механизациялаштырылған булырға тейеш. Һал ағыҙыуҙа механизмдар ҡулланыу хеҙмәт етештереүсәнлеген 6—8 тапҡырға күтәрә.

Машиналарҙа эшләү өсөн квалификациялы даими эшселәр кадры булдырыу тураһында серьез хәстәрлек күрергә кәрәк. Кадрҙар әҙерләү өсөн көстө лә, ваҡытты ла йәлләмәҫкә кәрәк.

Быйыл һал ағыҙыуҙа сезон эшселәренең ҙур армияһы ҡатнашасаҡ. Улар өсөн талап ителгән бөтә көн-күреш һәм культура шарттарын тыуҙырырға, аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары килтерергә, хеҙмәтте яҡшы ойошторорға кәрәк. Былар бөтәһе лә һал ағыҙыуҙы уңышлы үткәреүгә ярҙам итәсәк.

Быйылғы навигацияла һал менән ағыҙылған ағастың яртыһынан күбеһе һуңғы пункттарға пароходтар буксиры менән килтереләсәк. Бөтә һал ағыҙыусыларҙың һәм йылға флотының бөтәһенән элек Төньяҡ Двина, Ҡама, Об-Иртыш, Неман һәм Днепр бассейндәре работниктарының, бығаса булмаған рәүештә, берҙәм һәм ойошҡанлыҡ менән эшләүҙәре кәрәк. Үҙгән йылда булған, рейскә сыҡҡан буксир пароходтарының ремонт талап итеүҙәре, һалдарҙың ватылыу ваҡиғалары ҡабатланыуына быйыл һис юл ҡуйырға ярамай. Йылғасылар, һалсылар менән берҙәм эшләп, ағасты буксир менән ташыу планын һәм бөтә урында эш графиктарын үтәргә тейештәр.

Һал ағыҙыуҙың уңышлы үткәрелеүе шулай уҡ потребителдәрҙең һал менән ағыҙылған ағастарҙы массовый ҡабул итеүгә рейдтарҙы һәм бушатыу механизмдарын ниндәй кимәлдә әҙерләүҙәренә нык бәйләнгән.

Халыҡ хужалығын ағас менән уңышлы тәьмин итеү хәҙер һал ағыҙыусыларға һәм йылғасыларға ҡайтып ҡала. Әҙерләнгән бөтә ағас, һәр бер бүрәнәһенә тиклем, йылға ярына үҙ ваҡытында ташылырға, билдәләнгән урындарына юғалтыуһыҙ илтеп еткерелергә тейеш.

Планды үтәү өсөн һал ағыҙыу работниктарының бөтә мөмкинлектәре бар. Механизмдарҙы бөтә тулылығында үҙләштереүсе, йылғаларҙы үҙҙәренең ихтыярҙарына буйһондороусы стахановсыларҙың тәжрибәләрен тиҙләшеп, улар быйыл яңы производство уңыштарына өлгәшерҙәр һәм социалистик Ватандың экономик ҡеүәтен артабан нығытыуға ярҙам итерҙәр.

Г. Орлов.

СССР урман промышленноҫы Министры.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Италияла һайлауҙар нисек үтте

„Христиан демократтары" һәм уларҙың агентураһы тарафынан үткәрелгән алдашыуҙар

РИМ, 20 апрель. (ТАСС). Демократик газеталар, 18 һәм 19 апрелдә Италия парламентенә һайлауҙар барышында сиркәү ойошмалары һәм христиан демократтары бик күп масштабтарҙа алдашыуҙар, һайлаусыларҙы үҙҙәре файҙаһына алдау һәм мәжбүр итеү ҡулландылар, тип хәбәр итәләр. Христиан демократияһы сиркәү һәм уның «светский» ойошмалары ярҙамында һайлауҙарҙан күп элек тауыш биреү һөҙөмтәләрен ялғанлау һәм ялған итеп күрһәтеү системаһын ентекле рәүештә эшләне.

Һайлауҙар башланыр алдынан ике көн элек тейешле участкаһын христиан демократияһына ҡарата булһын һәм шулай уҡ халыҡ-демократик фронты яҡлы кешеләргә ҡарата ла яҡшы ҡарашта булған һайлаусылар исемлектәре участка һайлау комиссияларындағы христиан вәкилдәренә таратып бирелде. Был исемлектәр, «Унита» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, священниктар ҡатнашлығында, сиркәүҙәрҙә төҙөлгәндәр. Исемлектәргә христиан демократияһының үҙәк етәкселегенең тауыштарҙы һанаған ваҡытта теләккә ярашлы булмаған бюллетендәрҙе юҡ итеү методтары ентекле рәүештә яҙылған циркуляр хаты беркетелгән. Был хатта һайлаусыларҙың алда әйтеп үтелгән исемлектәрҙең тегеһендә йәки икенсеһендә яҙылғанлыҡтарына ҡарап урналарға ебәрергә ярҙам итеү йәки быға ҡомасаулау өсөн нәмә эшләргә кәрәклеге тураһында инструкциялар бар.

Тауыш биреү башланыу моментенә христиан демократияһы эмблемаһында тәре менән алдан уҡ билдәләнгән бюллетендәрҙе һайлаусыларға биреүҙең системаһы дөйөм милли масштабта ойошторолғайны. Рим газеталары, башҡаланың 812-се номерле һайлау участкаһында ошондай 300 бюллетень табылды, тип хәбәр итәләр.

Ошондай уҡ бюллетендәр Римдәге 747-се һәм 246-сы участкаларҙа, Рим янындағы Примавеллдә, Римдең Трастевер кварталында, Миландың ике участкаһында һәм Ломбардияның күп кенә пункттарында, Анкона, Неаполь һәм Таранто провинцияларында табылды. «Аванти», «Унита» һәм «Република» газеталарында яҙылған был хәбәрҙәр 20 апрелдә сарагатсыларҙың «Уманита» һәм «Италиа социалиста» органдары тарафынан раҫландылар.

Тауыш биреү моментендә һайлаусыларға йоғонто яһау өсөн, күп кенә һайлау участкалары сиркәүҙәрҙә һәм монастырҙарҙа һәм дини общиналарҙың биналарында урынлаштырылдылар.

Тауыш биреүгә йоғонто яһау маҡсатында, эске эштәр министре Шельба, һайлау законын тупаҫ рәүештә боҙоп, һайлау ваҡытында бөтә участка комиссияларының председателдәренә сенатҡа һайлауҙар һәм депутаттар палатаһына һайлауҙар өсөн бюллетендәрҙе бер үк ваҡытта бирергә тәҡдим итте.

Италияның бөтә районларынан христиан-демократик партияһы активистәре тарафынан тауыш биреү моментендә ойошторолған алдашыуҙар тураһындағы мәғлүмәттәр килеүе дауам итә. «Унита» газетаһы Римдәге христиан-демократик партияһы ойошмаһының һәр береһе икешәр һайлау свидетельствоһы алған 57 членының исемлеген иғлан итте. Римдәге Сан-Боско монастыренең монахтары тауыш биреү хоҡуҡы булған йөҙәрләгән башҡа кешеләрҙең һайлау свидетельстволарын законһыҙ рәүештә алдылар. Римдә Виа Националдә тороусы ниндәйҙер адвокат Бенедетти һайлауҙар алдынан массовый рәүештә һайлау свидетельстволары һатып алған һәм уларҙың һәр береһе өсөн 3—4 мең лир аҡса түләгән. Римдең һәм Миландың күп кенә больницаларында эшләүсе монахинялар, иркһеҙ рәүештә больницанан сығарыу менән ҡурҡытып, ауырыуҙарҙың һайлау свидетельстволарын тартып алғандар.

Сит илдең 18 монахиняһы Римдәге Трионфалле кварталында ялған свидетельстволар буйынса тауыш биргән. Гонзагола (Мантуя провинцияһы) ике монахиня ҡала участкаларының береһендә ике тапҡыр тауыш бирергә маташып ҡараған, ләкин был уңышһыҙ барып сыҡҡан.

Миланда бер һайлаусы уның свидетельствоһы буйынса тауыш биреүсе монахиняны бөтә халыҡ алдында фаш иткән. Газеталар ике тапҡыр тауыш бирергә маташыусы христиан-демократик партияһы члендәренең һәм монахиняларҙың ҡулға алыныуҙары тураһында хәбәр итәләр.

Реджо Нель Эмилиала һайлаусыларҙың һиҙгерлеге арҡаһында священник Дон Сфоракки тотолған, унда ике һайлау свидетельствоһы табылған. Венецияла 97-се номерле һайлау участкаһында ике монахиня тотолған. Уларҙан ялған свидетельстволар тапҡандар. Комола һайлау участкаһына ялған свидетельстволар менән килеүсе күп кенә монахинялар тауыш биреүгә ебәрелмәгәндәр. Римдә, Галлиакола сит кеше паспорты менән тауыш бирергә маташыусы монахиня тотолған. Римдә Санта Иссаба районында священник дүрт тапҡыр тауыш биргәс, ҡулға алынған. Римдә шулай уҡ ике тапҡыр тауыш биреүсе священник Каныкорн һәм Монте Сакро районы буйынса башҡа кеше свидетельстволары менән тауыш биреүсе ике монах тотолған.

Удиндә һайлау исемлектәренә индерелмәгән 300 «касаҡ» эске эштәр министерствоһының туранан-тура тығылыуы арҡаһында тауыш биргән.

Флоренцияла ике тапҡыр тауыш биреүсе Франциско монахы тотолған.

Анконда һәм Неаполдә шулай уҡ монахтарҙың бер нисә тапҡыр тауыш биреүҙәре һәм уларҙың башҡа кешеләр исеменә яҙылған свидетельстволар күрһәтеү ваҡиғалары булған. Неаполдәге һайлау участкаларының береһендә тауыш бирергә маташҡан сағында Англия кешеһе тотоп алынған. Ул участка комиссияһына үҙенең ысын һайлау свидетельствоһын күрһәткән. Комиссия, инглиз урнаға христиан-демократтары партияһынан күрһәтелгән кандидаттар исемдәре яҙылған бюллетендәр төшерергә маташты, тип билдәләгән.

Регаль—Бутола (Сицилия) «католик хәрәкәт» ойошмаһының инспекторы Вирджи тотолған, ул башҡа кеше свидетельствоһы менән тауыш бирергә килгән. Неаполдәге участка һайлау комиссияларының береһенең секретаре профессор Алнотто файҙаланмаған бюллетендәрҙе алдан христиан-демократтар өсөн бирелгән итеп билдәләп урналарға һалырға маташҡан сағында тотоп алынған. Неаполдә шулай уҡ христиан-демократик партияһының активисе участкаға үҙҙәренең личносен раҫлаусы танытмаһыҙ килеүсе үҙенә билдәле булмаған һайлаусыларҙың личносен «раҫлаусы» Скопьеро тотолған.

Монастырҙар һәм ҡыҙыл тәре органдары һайлауҙарҙа ҡатнашыу өсөн больницаларҙа ятыусы ҡаты ауырыу кешеләрҙе һәм паралитиктарҙы мобилизовать иткәндәр. Монахиняларға был кешеләрҙе һайлау кабиналары эсенә индереү эше тапшырылған. Римдәге «Умберто I» поликлиникаһы янындағы һайлау участкаһында монахиня—сестра Лючия шулай итеп 32 тапҡыр тауыш биргән, бер тапҡыр үҙе өсөн һәм 31 тапҡыр үҙе оҙатып килгән ауырыу кешеләр өсөн. Трастеверҙәге (Рим) богадельня монахинялары ике ай буйынса махсус курстар үткәндәр, бында уларға христиан-демократик партияһы өсөн нисек тауыш бирергә өйрәтелгән. Монастырҙарға һәм больницаларға теге йәки был һайлаусыларҙың уларҙы урналарға оҙатып барыуға мохтаж икәнлектәре тураһында бик күп танытмалар бирелгән. Тауыш биреү ваҡытында монахинялар оҙатып килгән (күҙәтеү маҡсатында булһа кәрәк) ҡайһы бер «һуҡырҙар» күрә торған кешеләр булып сыҡтылар.

Газеталар Триндән, Неаполдән һәм Пармаданан, ҡаты ауырыусы өс кешенең уларҙы монахинялар христиан-демократтар партияһы кандидаттары өсөн тауыш бирергә килтергән моментта һайлау кабиналарында үлеүҙәре тураһында хәбәр итәләр. Епископаттың махсус бойороғо буйынса 18 апрелдә йәкшәмбе көн бөтә сиркәүҙәрҙә христиан-демократтар партияһының һайлауҙарҙа еңеүе өсөн доға ҡылғандар. Анконадағы бер священник һәм Сицилиялағы бер священник ғибәҙәт ҡылыуҙы һайлау митингыларына әйләндергән өсөн суд властарына тапшырылған.

Болоньела һайлауҙар көнөндә «халыҡ демократик фронтының гонаһтары өсөн махсус тәүбә итеүҙәр» ойошторолдо. Газеталар сиркәү хеҙмәткәрҙәренең халыҡ демократик фронты яҡлы кешеләрҙе «христиандарҙың дошмандары» итеп күрһәтеү өсөн төрлө провокациялар үткәреүҙәре һәм үҙҙәренең түләүле агенттәрен ебәреүҙәре тураһында хәбәр итәләр. Сиркәүҙә хеҙмәт итеүселәрҙең агенттәре халыҡты «сиркәүҙәрҙе тар-мар итергә» күп тапҡырҙар саҡырып ҡарағандар һәм үҙҙәрен коммунистар итеп күрһәттеләр, ләкин был уңышһыҙ барып сыҡты.

Һайлауҙар көндәрендә хөкүмәт һәм сиркәү органдары халыҡ демократик фронтына ҡаршы юнәлтелгән иң фантастик провокацион хәбәрҙәр һәм ялғандар таратыуҙарын дауам иттерҙеләр.

Венгрияла ҙур енәйәтсе ойошманың фаш ителеүе

БУДАПЕШТ, 21 апрель. (ТАСС). Венгрия полицияһы государствоға ҡаршы ҙур енәйәтте фаш итте. Эске эштәр Министерствоһы матбуғат бүлегенең иғлан ителгән коммюникеһендә, ҙур төркөм енәйәтселәр Венгриялағы хәрби уйлап сығарыуҙарҙы сит илдәргә ебәреү менән шөғөлләнгән, тип әйтелә. Уның башында машиналар төҙөү акционерҙар обществоһы «ферротехниканың» илдән ҡасҡан генеральный директоры Летшен Вильмош торған. Летшен Вильмош үҙе бер нисә хәрби уйлап сығарыуҙарҙы һатып алған, улар араһында еңел автомат айырыуса әһәмиәткә эйә булып тора. Быны уйлап сығарылыуы тураһында Венгрия властарына бер нәмә лә белдерелмәгән. Енәйәтселәр, чертеждары, шулай уҡ был автоматты эшләп сығарыуҙың техник процесс яҙмаларын һатып алып, уны АҠШ-ҡа оҙатҡандар.

Сит илгә ҡасып китеүсе заговор башлыҡтары урлаған уйлап сығарылған нәмәләрҙе АҠШ генеральный штабы начальнигына тапшырғандар. Бынан тыш, автомат һәм башҡа уйлап сығарыуҙар үҙәк Америка государстволарының береһенең президентенә тәҡдим ителгән. Тикшерелгәндән һуң был уйлап сығарыу шул тиклем әһәмиәтле тип табылған, үҙәк Американың был государствоһы үҙенә тәҡдим ителгән проекттар һәм чертеждар буйынса уларҙы эшләп сығарыу өсөн махсус завод төҙөргә ҡарар иткән. Енәйәтселәр чертеждарҙы һәм башҡа уйлап сығарыуҙарҙы тормошҡа ашырыу өсөн уларҙы Венгриянан сығарырға уйлағандар. Енәйәтселәр Венгриянан сығыу өсөн кәрәк булған рөхсәтте АҠШ-тың Будапешттағы миссияһынан алырға иҫәп тотҡандар, һәм уларҙың бер өлөшө оформить ителгән дә булған.

Пресс-конференцияла Ловеттең белдереүе

ВАШИНГТОН, 22 апрель. (ТАСС). АҠШ государство секретаре вазифаларын үтәүсе Ловетт пресс-конференцияла, Ҡушма Штаттар Палестинанан Англия ғәскәрҙәрен сығарыуҙы кисектерел тороуға өлгәшергә тырышалар, тип белдерҙе. Ҡушма Штаттар Англия ғәскәрҙәрен сығарыуҙы кисектереү тураһында Англия менән һөйләшеүҙәр алып баралармы, тигән һорауға, Ловетт, һөйләшеүҙәр был пунктҡа ғына түгел, бәлки Палестиналағы хәлдең бөтә яғына ла ҡағылалар, тип күрһәтте. Ләкин Ловетт, Англия ғәскәрҙәрен сығарыу тураһында инглиздәрҙең позицияһы әлегә үҙгәрмәне, тип өҫтәне.

Америкалылар һәм инглиздәр тыйылған һауа зоналары булдырҙылар

БЕРЛИН, 22 апрель. (ТАСС). Германияның Америка һәм Британия оккупация зоналары аша транзитлы һауа осоштары өсөн махсус тыйылған зоналар булдырыу общественностең иғтибарын үҙенә йәлеп итә. Мәҫәлән, апрель башында Чехословакия самолетына Америка зонаһы аша Амстердамға осорға рөхсәт ителмәне: Берлиндә Англия хәрби властары Венгрия самолетына самолеттар тарафынан ғәҙәттә файҙаланыла торған маршрут буйынса Англия зонаһы аша Амстердамға осорға рөхсәт итмәнеләр һәм уға һынылыҡ һыҙыҡтар буйынса ҡатмарлы маршрут тәҡдим иттеләр. Һөҙөмтәлә самолет османы. 8 апрелдә Англия хәрби властары Польшаның Парижға осоусы самолеттары хәҙер шулай уҡ яңы һынылыҡ маршрут буйынса барырға тейештәр, тип иғлан иттеләр.

Германияның Америка һәм Англия оккупация зоналары территориялары өҫтөндә тыйылған һауа зоналарын индереү, ошо зоналар өҫтөндә һауала осоу өсөн ҡыйынлыҡтар тыуҙырып, осоуҙарҙың маршрутын байтаҡ оҙайтты һәм ҡатмарландырҙы.

Италияла полиция репрессиялары

ПАРИЖ, 22 апрель. (ТАСС). Франс-Пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Сан-Северола (Фоджига яҡын урында) полиция демонстрацияны таратыу өсөн күҙҙән йәш ағыҙыусы газ ҡулланған. Демонстранттар эске эштәр министре Шельбаны һайлауҙар ваҡытында алдашыуҙа ғәйепләгәндәр.

Варшавала Польша-Совет договорының йыллығына арналған тантаналы ултырыш

ВАРШАВА, 21 апрель. Бөгөн Варшавала Польша һәм СССР араһында дуҫлыҡ, үҙ-ара ярҙам һәм һуғыштан һуңғы хеҙмәттәшлек тураһындағы договорҙың өс йыллығына арналған тантаналы ултырыш булды. Ултырышта сеймдең вице-маршалы Барциковский, премьер-министр Циранкевич, премьер-министрҙың урынбаҫары Гомулка, сит ил эштәре министре Модзелевский, милли оборона министре маршал Роля-Жимерский һәм Польша хөкүмәтенең башҡа члендәре, СССР-ҙың Польшалағы посолы В. З. Лебедев етәкселегендәге дипломатик корпус вәкилдәре, шулай уҡ башҡаланың профсоюз, общественный һәм культура ойошмаларының ике меңдән артыҡ вәкилдәре ҡатнаштылар.

Ултырышты асып, Польша-Совет дуҫлығы обществоһының председателе, министр Свентковский Польша менән СССР араһында бынан өс йыл элек ҡул ҡуйылған һәм ике ил араһындағы мөнәсәбәттәрҙе тамырынан үҙгәртеү булып тороусы договорҙың тарихи әһәмиәтен билдәләп үтте. Договорға ҡул ҡуйылғандан һуң үткән өс йыл, тине ул, тигеҙлек, тәрән рәүештә үҙ-ара хөрмәт итешеү һәм суверенитет принциптарына нигеҙләнеп төҙөлгән яҡшы күршелек мөнәсәбәттәрен ҡауҙәләндереү булып торҙолар.

Совет-Польша договорын рухландырыусы булыуҙары яғынан Сталин һәм Польша республикаһы президенты Берут исемен хәтергә алғанда ҡатнашыусылар оҙаҡ рәүештә алҡышландылар.

Шунан һуң сит ил эштәре министре Модзелевский ҙур доклад менән сығыш яһаны. Ул ике илдең дә договор буйынса үҙ өҫтөрөнә алған йөкләмәләрҙе үтәлешен конкрет мисалдарҙа һәм фактыларҙа күрһәтеп бирҙе.

Ултырышта шулай уҡ СССР-ҙың Польшалағы посолы В. З. Лебедев сығыш яһаны.

Ҡабул ителгән резолюцияла, «уҙған өс йыл Польша менән Советтар Союзы араһындағы союздың тарихи әһәмиәтен тулыһынса раҫланы», тип әйтелә.

Ултырышҡа йыйылған кешеләр Генералиссимус И. В. Сталинға һәм Польша Республикаһы президенты Б. Берутҡа ҡотлау телеграммаһын көслө алҡыштар аҫтында ҡабул иттеләр.

Илдең башҡа күп кенә воеводстволарында ла һәм промышленность үҙәктәрендә лә договорға ҡул ҡуйылыуҙың өс йыллығына арналған тантаналы ултырыштар булды.

ГАРРИМАНДЫ АҠШ-тың ЕВРОПАЛАҒЫ ВӘКИЛЕ ИТЕП БИЛДӘЛӘҮ

ВАШИНГТОН, 22 апрель. (ТАСС). Аҡ Йорттоң хәбәр итеүенә ҡарағанда, Трумэн АҠШ-тың сауҙа министре Гарриманды «Маршалл планын» үтәү менән бәйләнештә посол рангыһында Ҡушма Штаттарҙың Европалағы махсус вәкиле итеп билдәләгән. 22 апрелдә Гарриман сауҙа министре постынан отставкаға сыға. Гарриман «Маршалл планында» ҡатнашыусы илдәр тарафынан күптән түгел төҙөлгән ойошмала Ҡушма Штаттарҙың вәкиле булып торасаҡ.

Аҡ Йорт секретаре Росс: Гарриманды яңы постҡа билдәләргә Трумэн ҡарар итте, сөнки был пост «беренсе дәрәжәләге әһәмиәткә эйә булып тора», тип белдергән.

Һаҡлыҡ кассаларының халыҡты хеҙмәтләндереүен яҡшыртырға

Халыҡтың һаҡлыҡ кассаларына индергән аҡсалары, шулай уҡ һаҡлыҡ кассалары аша таратылған государство заемдарын һатыуҙан килгән доход — социалистик төҙөлөштө аҡса менән тәьмин итеүҙең мөһим бер тармағы булып тора.

Башҡортостанда һаҡлыҡ кассаларына үҙҙәренең аҡсаларын һаҡлыҡҡа тапшырған хеҙмәтсәндәрҙең һаны 84 мең кешегә етә. Тик 1947 йылда ғына һаҡлыҡ кассаларының вкладтары 46.561 мең һумға артты, ә заем алыусыларҙың һаны 750 мең кешегә етте. Шул уҡ ваҡытта һаҡлыҡ кассалары 75.290 күп семьялы һәм яңғыҙ әсәләргә ярҙам күрһәтеү — пособие биреү хеҙмәтен үтәйҙәр.

Хәҙерге ваҡытта һаҡлыҡ кассаларының алдында быға тиклем сығарылған бөтә төр заемдарҙы ике процентле конверсион заемға алыштырыу бурысы тора. Башҡортостанда 3,5 миллиард һумдан артыҡ заем алыштырылырға тейеш. Быны өсөн бөтә заем тотоусыларҙың облигацияларын тикшереп сығырға һәм улар буйынса отоштар түләүҙе тамамларға кәрәк. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының ҡарары буйынса ошо йылдың 5 мартынан 5 апреленә тиклем заем отоштарын тикшереү айлығы үткәрелде. Был айлыҡта барлығы 351 меңдән артыҡ заем тотоусының облигацияһы тикшерелеп, 367 мең һум отош аҡсаһы түләнде.

Айлыҡ бигерәк тә Яңауыл, Дүртөйлө, Покровка, Саҡмағош, Өфө ҡалаһының Молотов һәм Ленин райондарында ойошҡан рәүештә үтте. Мәҫәлән, Дүртөйлө районында ауыл Советтары буйынса заем взностары индереү һәм улар буйынса облигациялар тапшырыу эше тулыһынса тамамланды. Отоштар тикшереү айлығы ваҡытында 76 урында белешмә өҫтәле ойошторолдо, 6.525 заем тотоусының облигацияһы тикшерелеп, 2 мең һум отош аҡсаһы түләнде.

Ләкин айырым райондарҙа, мәҫәлән, Ауырғазы, Мәләүез, Бөрө райондарында государство миәтенләгә был мөһим эшкә йешле иғтибар бирмәү арҡаһында отоштар тикшереү айлығы үткәреү алдына ҡуйған бурыстарҙы үтәй алманы. Был райондарҙа подписчиктарға облигациялар тапшырылмаған.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство заемының 1 тиражы ошо йылдың 26—27 июнендә үткәреләсәк. Шуның өсөн отоштарҙың беренсе тиражы үткәрелеү көнөнә тиклем заем хужаларына облигациялар таратыу эшен тамамларға кәрәк.

Финанс органдары һәм һаҡлыҡ кассалары комсодтар, финанс активтәре менән эш итеүҙе көсәйтергә, быға тиклем сығарылған заемдарҙы ике процентле конверсион заемға алыштырыу тураһында заем тотоусылар араһында массовый эште киң йәйелдерергә һәм заем алыштырыу эшен өлгөлө башҡарырға тейештәр.

Я. Бәҙертдинов.

Республика райондарында кинолар

Яҙғы сәсеү кампанияһы осоронда колхозсыларҙы һәм ауыл хужалығы работниктарын кино менән хеҙмәтләндереү өсөн «Главкинопрокат» республикабыҙҙың райондарына яңы фильмдар ебәрҙе. Улар араһында башҡорт теленә тәржемә ителгән «Тормош хаҡына», «Ауыл уҡытыусыһы» һәм «Пирогов» фильмдары айырыуса ҡыҙыҡһыныу тыуҙырасаҡтар. Бынан тыш рус телендә бара торған һәм башҡорт телендә аңлатмалар яҙылған 4 фильм: «Ленин Октябрҙә», «Ленин 1918 йылда», «Крейсер Варяг» һәм «Тормош хаҡына» фильмдары ебәрелде.

Райондарҙа бөтәһе 145 күсмә кино эшләйәсәк, шуларҙан 96-һы тауышлы картина. Былардан тыш район үҙәктәренең һәр береһендә кино установкалар эшләйәсәк һәм 15 районда кино-фестиваль үткәрелә.

Райондарға ебәрелгән фильмдар араһында «Юғары урожай мастерҙары», «Икмәк», «Колхоз яңылыҡтары» һәм «Культуралы малсылыҡ крайы» тигән фәнни-популяр фильмдар бар.

Райондарға бөтәһе 380 дана фильм ебәрелде.

Яңы ҡаланың матбуғат байлығы

Элек мәктәбе лә булмаған Богородский ауылы районында сталинсе биш йыллыҡтарҙа промышленность үҙәге булған Черниковск ҡалаһы барлыҡҡа килде.

Был ҡалала хужалыҡтың бөтә тармаҡтары менән бер рәттән, культура үҫеүе лә көндән-көн үҫә. Хәҙер уның китап фондына бай булған өс парткабинеты, бер техник һәм уҡлап эшселәр библиотекаһы, шулай уҡ ҡыҙыл мөйөштәре бар. Ҡала хеҙмәтсәндәренең матбуғатҡа булған талаптары ла йылдан-йыл үҫә бара. Ошо талаптарҙы тәьмин итеү маҡсатында партия һәм совет яңы ҡалаға бик күп һанда ваҡытлы матбуғат ебәрә. Мәҫәлән, бында 19.842 дана өлкә һәм ҡала газеталары, 4.268 дана үҙәк газеталар, шул иҫәптән 2 мең дана «Правда» һәм 4.086 дана өлкә һәм үҙәк журналдары таратыла.

Ҡала хеҙмәтсәндәре 14 төрлө газета һәм 10 төрлө журнал алдыралар. Ҡаланың связь конторалары матбуғат таратыу буйынса республикала беренсе урында тора.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драм театрында — «ЕТЕ ЮЛ САТЛЫҒЫНДА». Башлана киске 8 сәғәт 30 минутта.

Башгосфилармонияла — А. Н. Островский әҫәрҙәренән концерт. Башлана киске 9 сәғәттә.

«Октябрҙә» — «СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта» — «ЦАРИЦЫН ОБОРОНАҺЫ».

Матросов исемендәге кинола — «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».



СТРАХОВАТЬ ИТЕРГӘ ОНОТМАҒЫҘ.
Госстрах агенттәрен өйөгөҙгә саҡырығыҙ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00132. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 83
25
апрель
йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин

Республикабыҙҙа яҙғы баҫыу эштәре башланды. Социалистик ауыл эшсәндәре! Яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн бөтә көсөбөҙҙө бирәйек!

Яҙғы сәсеүҙе юғары ойошҡанлыҡ менән үткәрәйек!

Республикабыҙ яҙғы сәсеүгә төштө.

Ҡар һыуҙары тотоуҙан, ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙан башланған баҫыу эштәренең фронты киңәйә. Йәҙәрләгән колхоздар күп йыллыҡ үләндәр сәсәләр, яҙғы һөрөү, тырматыу, культивациялау эштәре алып баралар.

Башҡортостан игенселәре алдында быйыл айырыуса яуаплы бурыстар тора. Бөтә ашлыҡ культураларының сәсеү майҙанын байтаҡ киңәйтеү менән бер рәттән, уларҙан урожай алыуҙы ла нығлы күтәрергә кәрәк. Был бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Былтыр күп кенә майҙан ер туңға һөрәлеп ҡалдырылды. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ ауыл хужалығын механизациялаштырыуҙа ярҙамды йылдан-йыл көсәйтәләр. Быйыл Башҡортостан колхоздары һәм МТС-тары бик күп яңы машиналар алдылар һәм аласаҡтар. Колхоздар ойоштороу-хужалыҡ яғынан күренекле нығындылар. Былар, бөтәһе лә яҙғы сәсеүҙе яҡшы ойошҡанлыҡ менән, ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары сифатлы итеп башҡарыуға мөмкинлек бирәләр.

Колхоздарҙа, МТС-тарҙа булған бөтә көс баҫыуға ташланырға тейеш. Иң мөһиме — баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә ҡуҙғала алмаусылыҡҡа юл ҡуйырға ярамай. Яҙғы сәсеүҙе юғары темп менән алып барыу өсөн тоташ участкаларҙың өлгөрөүен көтөргә ярамай. Һәр бер участканы һайлап һөрә, тырмата, сәсә барыу баҫыу эштәренең срогын ҡыҫҡартыуға ныҡлы ярҙам итәсәк.

Темпты күтәреүҙә тракторҙарҙы һәм башҡа ауыл хужалығы машиналарын тулы ҡеүәтендә файҙаланыу хәл иткес роль уйнай. Һәр бер машинаның тәүлек әйләнәһенә эшләүен, көндәлек нормаларҙың үтәлеүен һәм арттырып үтәлеүен тәьмин итергә кәрәк. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бөтә машиналарҙың да файҙаланылыуы өҫтөнән ҡаты контроль ҡуйылырға тейеш.

Яҙғы сәсеүҙә юғары темп өсөн көрәшеү менән бер рәттән, алдынғы агротехника талаптарын тулы үтәү өсөн дә көрәште киң йәйелдереү талап ителә. Һәр бер һөрөлгән участка шунда уҡ тырматыла барырға һәм сәселергә тейеш. Был эштәрҙе башҡарыуҙа һуңлау ерҙә дым запасын кәметә һәм урожайҙы түбәнәйтә. Бөгөн һөрһәң — иртәгә сәс! — алдынғы совет агротехникаһының талабы шул. Баҫыу эштәренең сифатын боҙоусыларға, брак менән эшләүселәргә ҡаршы көрәште һәр бер звенола, бригадала, колхозда, трактор бригадаһында алып барырға кәрәк.

Хәҙер бөтә районлаарҙа ла, бөтә колхоздарҙа ла баҫыу эштәрен массовый рәүештә йәйелдереү өсөн шарттар тыуҙы. Эш көндән-көн ҡыҙа барырға, темп күтәрелергә тейеш. Ужым культураларын үҙ ваҡытында аҙыҡландырыу һәм тырматыу эштәрен ойоштороу менән бер рәттән, бөтә көстө иртә культураларҙы, иң беренсе нәүбәттә ҡиммәтле ашлыҡ культураларынан яҙғы бойҙайҙы мөмкин тиклем иртәрәк сроктарҙа сәсеп ҡалыуға тупларға кәрәк. Бойҙайҙың яҡшы ерҙәргә — туңға һөрөлгән, сиҙәм, ҡара-ҡура, күп йыллыҡ үлән ерҙәренә сәселергә тейеш. Күп йыллыҡ үләндәр игенселекте күтәреүҙә хәл иткес роль уйнайҙар. Уларҙы ла шулай уҡ иртә сроктарҙа сәсеү өсөн хәстәрлек күрергә, һәр бер колхоз буйынса пландың арттырылып үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Башҡортостан игенселәренең 1947 йылда урожай өсөн фиҙакәр көрәштәрен партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ юғары баһаланы. Алдынғыларҙан 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде һәм йөҙәрләгән колхозсылар, трактористар, звеньеводтар, колхоз, МТС һәм район етәкселәре ордендәр һәм миҙалдар менән наградландылар. Совет хөкүмәтенең юғары наградаһына республикабыҙ игенселәре мул урожай өсөн көрәштә конкрет йөкләмәләр алыу һәм практик эш менән яуап бирҙеләр. 1948 йылда тағы ла юғарыраҡ урожай үҫтереү өсөн социалистик ярыш киң йәйелә. Партия, совет ойошмаларының бурысы — был ҡеүәтле хеҙмәт күтәрелешен тағы ла көсәйтеүҙән, бөтә көстө яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүгә туплауҙан тора.

Иптәштәр, колхозсылар, колхозсы хатын-ҡыҙҙар! Һеҙҙең алдығыҙҙа яҙғы сәсеүҙе өлгәлә үткәреү буйынса торған бурыстар яуаплы һәм почетлы. Баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн бөтә көсөгөҙҙө бирен эшләгеҙ, социалистик баҫыуҙарҙа хеҙмәт батырлыҡтары күрһәтегеҙ. Һәр бер культура үҙ ваҡытында, яҡшы эшкәртелгән ерҙәргә сәселһен. Һәр бер колхоздың сәсеү планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланығыҙ.

Механизатор иптәштәр! Яҙғы сәсеүҙең уңышын машина-трактор станциялары хәл итәсәк. Тракторҙар паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланыу һәм агротехника талаптарын тулыһынса үтәү — һеҙҙең изге бурысығыҙ. Смена һәм көндәлек нормаларҙы арттырып үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ. Колхоздар менән төҙөшкән договорҙарҙың һәр бер пунктын теүәл үтәгеҙ, үҙегеҙҙең батыр хеҙмәтегеҙ менән юғары урожай яулап алыуҙы тәьмин итегеҙ.

Район ауыл хужалығы бүлектәренең баш агрономдары — трактор эштәренең сифатын контролләү буйынса государство инспекторҙары! Агроном иптәштәр! Баҫыу эштәренең иң яуаплы участкаларында булығыҙ, совет агрономия фәне һәм алдынғыларҙың өлгәшеүҙәрен колхоз производствоһына ҡыйыу индерегеҙ, брак менән эшләүгә юл ҡуймағыҙ.

Яҙғы сәсеү—республикабыҙҙың бөтә колхозсылары, трактористәре, ауыл хужалығы специалистәре, партия, совет ойошмалары өсөн ҙур һынау. Уны уңышлы башҡарыу өсөн большевиктарса эшләргә, колхоздарҙа, МТС-тарҙа, совхоздарҙа булған бөтә резервтарҙы тулы файҙаланырға кәрәк.

Еңеүле юлға, колхозсы иптәштәр!

ФӘН ҺӘМ УЙЛАП СЫҒАРЫУҘАР ӨЛКӘҺЕНДӘ СТАЛИН ПРЕМИЯЛАРЫ БУЙЫНСА КОМИТЕТ ПЛЕНУМЫ

20 апрелдә академик А. Н. Несмеянов председателлегендә фән һәм уйлап сығарыуҙар өлкәһендә Сталин премиялары буйынса комитеттең пленумы асылды.

Пленумда 1947 йылға Сталин премияларын биреүгә тапшырылған бик күп һандағы фәнни хеҙмәттәрҙе һәм уйлап сығарыуҙарҙы тикшереүҙе секцияларҙың эш йомғаҡтары ҡаралды.

Секцияларҙа 766 эш тикшерелгән. Улар араһында — уҙған йылда иғлан ителгән 195 фәнни хеҙмәт бар. Ҡалғандары халыҡ хужалығында тормошҡа ашырыла торған уйлап сығарыуҙар һәм производствоға эш методтарын тамырынан камиллаштереүҙәргә ҡайтып ҡала.

Пленумдың беренсе өлөшө фән өлкәһендәге хеҙмәттәрҙе тикшереүгә арналды. Академик А. Ф. Иоффеның белдереүенә ҡарағанда, физика-математика фәндәре секцияһында тикшерелгән күп кенә уйлап сығарыуҙар хәҙерге заман физикаһының, геофизикаһының, математикаһының һәм астрономияһының яңы мәсьәләләрен яҡтырталар. Секция химиктарҙың 18 эшенән алтыһын һайлап алған.

Шулай уҡ геолого-география фәндәре секцияһының етәксеһе академик А. Н. Заварицкийҙең һәм академик Л. А. Орбелиҙең белдереүҙәре тыңланды. Академик Орбели биология фәндәре өлкәһендә тапшырылған хеҙмәттәрҙе тикшереү һөҙөмтәләре тураһында белдерҙе.

СССР Фәндәр Академияһы президенты С. И. Вавилов, СССР юғары белем Министры С. В. Кафтанов, СССР Фәндәр Академияһының башҡа академиктары һәм член-корреспондентары пленум эшендә ҡатнашалар.

(ТАСС).

Ауыл хужалығы алдыңғыларына наградалар тапшырыу

Һүрәттә: БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Ғ. В. Ниғмәтжанов Ҡырмыҫҡалы районы «Урал» колхозы звеньевоһы Банат Батыроваға Ленин ордене һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын миҙале тапшыра.

В. Жданов фотоһы.

Батыр хеҙмәткә лайыҡлы награда

Яҙғы ҡар һыуҙары ташып аҡҡас, бағаж-ҡртаға бөтә баҫыуҙары иңкәтеп сәсеүгә сығырға торғанда, республикабыҙҙың башҡалаһына — Өфөгә юғары наградалар алырға килгән крәҫтиәндәрҙең шатлыҡтары йөҙҙәренә сыҡҡан. Верховный Совет залына ингәс тә тыныслана алмайҙар әле улар.

— Беҙҙекеләр ошо арала һабанға сыҡмаҡсы булып ҡалғайнылар, — ти Туймазы районының «Бүлек тау» колхозы звеньевоһы 19 йәшлек комсомолка Рәшиҙә Садикова. — Беҙ әйләнеп ҡайтып еткәнһәк ҡына ярар ине.

Шул уҡ колхоздың иң ҡарт кешеһе Харис бабай Ғабдрахманов Рәшиҙәне һәм уның [illegible] алмай. Ул үҙе лә йәштәрҙән ҡалышмай [illegible]. Сеңкә Харис бабай үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр намыҫлы эше өсөн орден алырға килгән. Залға ин тәүҙә килеп ултырған Туймазылар [illegible] һенә башҡа районлаштар ҙа килделәр. Таныштар, һөйләшәләр, бергә фекер алышалар. Һүҙ быйыл яҙғы сәсеүҙе нисек яҡшыраҡ һәм иртәрәк итеп үтеү, алдыңғы агротехника методтарын ҡулланыу тураһында бара. Бөртөклө ашлыҡ культураларын үҫтереү мәсьәләһендә әйтер һүҙҙәр әйтелеп бөтмәй, [illegible] алға сыға.

— Была Банатты күрергә кәрәк ине мина. Бик күрәһем килә ине.

— Һеҙ күрергә теләгән кеше мин булам инде, — ти Батырова. [illegible] һүҙә.

— Газеталарҙа ташҡан һүрәттәрегеҙҙе [illegible]. Мин Туймазы районының «Сулпан» колхозынан булам. [illegible]

«Сулпан» колхозынан килгән Гөлнафис Кулашева, герой менән күптәнге таныш кеүек итеп, сөгөлдер үҫтереү тураһында һорашып китте.

Ләкин һүҙҙе дауам итергә тура килмәй. Звонок тауышы ишетелеп тә, Банат Батырова һуңынан үҙенең эш тәжрибәһен ентекләп һөйләп бирергә вәғәҙә итеп, алға барып ултыра.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Ниғмәтжанов бында килгән ауыл хужалығы алдыңғыларын юғары наградалар менән ҡотлай һәм СССР Верховный Советы Президиумы исеменән уларға ордендәр һәм миҙалдар тапшырыу тәртибен иғлан итә.

Башҡортостандың ауыл хужалығы алдыңғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройҙары исеме биреү тураһындағы СССР Верховный Советы Президиумы Указынан беренсе булып Банат Батырованың [illegible] гектар майҙандың һәр гектарынан 611 центнер сөгөлдер урожайы алған звеньевоһының исеме уҡыла.

Президиум өҫтәле эргәһенә барыу өсөн урынынан торған данлы звеньеводты бөтәһе лә ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алалар. Иптәш Ниғмәтжанов Батырованы юғары награда менән ҡотлап, уның күкрәгенә «Ураҡ һәм сүкеш» алтын миҙалы һәм Ленин ордене ҡаҙай. [illegible] бөтә залды яңғыратты.

— Партиябыҙға һәм хөкүмәтебеҙгә [illegible] сөгөлдерҙән һәм бөртөклө ашлыҡ культураларынан тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн [illegible] тырышып эшләрмен, — ти Социалистик Хеҙмәт Геройы Банат Батырова. — Совет крәҫтиәндәренең хеҙмәтен шулай юғары баһалаусы бөйөк Сталинға бөтә йөрәгемдән ҙур рәхмәт.

«Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене менән наградланыусыларҙан беренсе булып Абдулин Ғабдрахман — «Туймазы районының «Бүлек тау» колхозы бригадиры президиум өҫтәле эргәһенә килә. Уның бригадаһы үҙған йылы [illegible] 21 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,97-шәр центнер арыш үҫтереп алғайны.

Ҡырмыҫҡалы районының «Иҙел» колхозы члены Байғилдин Ғәзизгә икенсе булып «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене тапшырыла. Унан һуң Буздәк районының «Сулпан» колхозы бригадиры [illegible], Туймазы районының хеҙмәт алдыңғыһы [illegible], Ауырғазы районы колхозсылары Зәйнә, Зәйдолов һәм башҡа иптәштәргә ордендәр тапшырылды.

Күкрәгенә «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене тағып президиум өҫтәленән үҙ урынына барып ултырыусы [illegible].

— Ҡырмыҫҡалы районының Чапаев исемендәге колхоз председателе, ауыл хужалығын үҫтереүҙә өсөн инде икенсе тапҡыр совет хөкүмәте тарафынан наградланған Герасим Андреевич Зайцев. Республикабыҙҙың районларына был колхоздың даны киң таралған. Герасим Андреевич етәкселегендәге артель [illegible] 60 гектар арыштың һәр гектарынан 22-шәр центнер, ә бөтә майҙанынан 12—13-әр центнер урожай алды. Бөгөн колхоздың алдыңғы кешеләренән 13 колхозсы ордендәр һәм миҙалдар ала.

— Быйыл башланасаҡ ауыл хужалығы эштәрендә хеҙмәт батырлыҡтары һаны тиҫтәләп иҫәпләнәсәк, — ти Герасим Зайцев.

Благовар районының «Һабансы» колхозы председателе Зәйдолов Хамаҙыр 67 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер арыш урожайы үҫтергәне өсөн «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордене алды.

Колхозсылар бер-бер артлы президиум өҫтәле эргәһенә барып наградалар алалар. Күкрәктәренә ордендәр һәм миҙалдар таҡҡан кешеләрҙең һаны арта бара.

— Яңы уңыштар теләйбеҙ, һеҙгә, орденле иптәштәр!

Ғ. Әхмәтшин.

24 апрель, 1948 йыл.

ӨЛГӨРГӘН ҺӘР БЕР УЧАСТКАНЫ ҺӨРӨРГӘ, СӘСЕРГӘ!

Тиҙ һәм яҡшы итеп сәсәбеҙ

Быйыл яҙҙың һуңлап килеүе беҙҙән баҫыу эштәрен айырыуса ҡыҫҡа сроктарҙа, ойошҡан рәүештә үткәреүҙе, һәр бер сәғәт һәм минутты дөрөҫ файҙаланыуҙы талап итә.

Беҙ яҙғы сәсеүгә эш планын бына ошо талаптарҙы үтәрлек итеп төҙөнөк. Эшсе һәм тартыу көстәрен алдан ныҡлап уйлап һәм иҫәпләп айырым эш участкаларына бүлдек. Баҫыу эштәрендә бөтәһе 116 кеше, шул иҫәптән 20 йәш үҫмер эшләй. Улар бөтәһе лә звеноларға беркетелделәр. Бөтәһе 6 звено эшләй.

Быйыл 479 гектар майҙанда сәсеү үткәрелергә тейеш, шуның 400 гектарҙан артығы бөртөклө ашлыҡ, 13 гектары техник культуралар, 18 гектар күп йыллыҡ үләндәр. Бынан башҡа 16 гектар майҙанда йәшелсә һәм 25 гектар майҙанда картуф ултыртабыҙ.

Ҡиммәтле аҙыҡ культураһы булған бойҙай сәсеү майҙанын быйыл 86 гектарға арттырабыҙ. Был культураны беренсе нәүбәттә туңға һөрөлгән ергә сәсәбеҙ. Бөртөклө ашлыҡ культуралары бары тик теҙмә юл менән генә сәселә. Быны өсөн 6 сәскесте иртәнән алып, ҡараңғыға тиклем тулы нагрузка менән эшләтәсәкбеҙ. Бары тик аттар, кешеләр генә алмаштырылып торасаҡ. Бөтә һабансыларға, сәсеүселәргә һәм тырмасыларға көндәлек эш нормалары һәм заданиелар бирелде. Үҙебеҙҙә булған мөмкинлектәрҙе иҫәпләгәндән һуң, иртә культуралар сәсеүҙе 11 эш көнөндә, ә һуңғы культуралар сәсеүҙе 7 эш көнөндә тамамларға булдыҡ. 35 баш эш атынан башҡа беҙҙең егергә өйрәтелгән 30 баш мөгөҙлө эре малыбыҙ бар. Улар күберәк еңелерәк эштәрҙә, тырмала, баҫыуға орлоҡ, һыу ташыуҙа эшләйҙәр. Был, эш аттарына булған нагрузканы еңеләйтеүгә мөмкинлек бирә.

Беҙҙең һәр бер сәғәт һәм минут иҫәптә. Ҡар ирей башлау менән үк баҫыуҙарҙың өлгөрөүен күҙәтеү өсөн постар ҡуйҙыҡ һәм өлгөргән урында шунда уҡ эшкә башланыҡ. Тәүге ике көн эсендә генә 22 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды. Был эш көндән-көн киңәйә бара.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле Степан һәм Александр Клинин иптәштәр етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадалары сәсеүҙе айырыуса яҡшы әҙерлек менән, ойошҡан рәүештә башланылар һәм сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн саралар күрәләр. Һөрөү менән тырматыу араһында әҙәклеккә юл ҡуйылмаясаҡ.

Колхозыбыҙҙағы юғары урожай мастерҙарынан 17 кешенең хөкүмәт ордендәре һәм миҙалдары менән наградланыуы баҫыуҙа ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Уҙған йыл беҙ 45 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 21-әр центнер урожай алһаҡ, быйыл 184 гектар майҙанда арыштың һәм 290 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан шул тиклем үк урожай алыу бурысын ҡуйҙыҡ. Беҙ был бурысты ла уңышлы үтәп сығасаҡбыҙ.

«Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» орденле М. Голков.
Бөрө районы «Урал» колхозы председателе.

Беренсе бураҙна

ДҮРТӨЙЛӨ. (Телефон аша). Район колхоздары массовый рәүештә ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландыралар. Юғары урожай үҫтереүҙе төп бурыс итеп ҡуйған игенселәр иртәнән кискә тиклем баҫыуҙарҙа эшләйҙәр. 1.400 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылып, план тулыһынса үтәлде.

Күп колхоздар пландан тыш майҙанда ужымдарҙы аҙыҡландырыуҙы дауам итәләр. «Кадр», «Ағым», «Ағиҙел», «Рот-фане» һәм башҡа колхоздар пландан тыш 30 — 50-шәр гектар майҙанда ужымдарҙы аҙыҡландырҙылар ҙа инде.

23 апрелдә «Игенсе» колхозы (председателе иптәш Тимерғазин) һабансылары баҫыуға сыҡтылар. Улар һоло сәсеү өсөн сиҙәм һөрә башланылар.

Сиҙәм күтәрәләр

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Әлшәй районы колхоздарының баҫыуҙарында яҙғы эштәр көндән-көн киңерәк йәйелә. 52 колхоз баҫыу эштәрен башланы.

«Үрнәк» колхозында 40 гектар ужым сәсеүлеге аҙыҡландырылды. Был эштә Рауза Әхмәдиева звеноһы алда бара. Ул үҙенә беркетелгән 15 гектар ужым сәсеүлегенә өҫтәмә рәүештә аҙыҡландырыу үткәрҙе. Һәр бер гектарға 4-әр центнер көл һәм тиреҫ шыйыҡсаһы индерелде.

«Сулпан», «Трудовик», «Пятилетка», «Марс» колхоздары членләре лә ужымдарҙы тәрбиәләү эшенә ныҡлы иғтибар бирәләр. Улар 70—120 гектар майҙанда өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙеләр. Аҙыҡландырылған майҙан район буйынса 1465 гектар тәшкил итә.

«Ҡыҙыл байраҡ» колхозын хеҙмәтләндереүсе Ташлы МТС-ның иптәш Мәүлияров етәкселек иткән трактор бригадаһы районда беренсе булып һөрөү эштәрен башланы. 3 көн эсендә 18 гектар сиҙәм күтәрелде. Яҙғы һөрөү эштәре Калинин исемендәге колхозда ла алып барыла. Бында 5 һабан эшләй. 8 гектар сиҙәм һөрөлдө лә инде.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Эш ойошҡан рәүештә башланды

ПЕТРОВСК. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Маҡар районының күп кенә колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре башланды. Район орлоҡсолоҡ хужалығы булған «Яңы йорт» колхозында 20—21 апрелдә массовый субботник ойошторолдо, 130 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре өҫтөндәге боҙ ҡатламын ваҡ киҫәктәргә ваттылар һәм 120 гектар ужым аҙыҡландырылды. Субботникта 100-гә яҡын колхозсы ҡатнашты.

«Ҡашалаҡ» колхозында хәҙер бөтә звенолар ҙа баҫыуҙа эшләйҙәр. Бер төркөм колхозсылар һабан ашлыҡтары сәселәсәк ҡалҡыу ерҙәрҙә ҡар һыуҙары тоталар. Ә икенсе берәүҙәр ужым сәсеүлектәрен көл һәм тиреҫ шыйыҡсаһы менән аҙыҡландыралар.

Сталин исемендәге колхоз председателе иптәш Мусин, гәзиттәгеҫә баҫыуҙарҙы тикшереп ҡайтҡас, бригадирҙәрҙе, звеноларҙы йыйнап алды.

— Ужымдар ҡайһы бер урындарҙа хәлһеҙләнеп сыҡҡандар. Уларҙы тиҙерәк йәшәндереү өсөн иртәгәнән аҙыҡландырырға кәрәк, — тине.

Ә иртәгәһен Сания Әмирова, Нурия Асылбаева, Зөләйха Ниғмәтуллина иптәштәр үҙ участкаларына сығып, ужымдарҙы аҙыҡландыра башланылар.

«Өлкәр», «Восток», «Ҡыҙыл таң», «Игенселәр» колхоздарында ла тәүге баҫыу эштәре ойошҡан рәүештә башланды.

Ғ. Ҡотлобаев.

Һабанға төштөләр

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша). «Үрнәк», «Ярыш» һәм «Раевка» ауыл хужалығы артелдәре һабанға төштөләр. «Үрнәк» колхозы һабансылары тәүге көндә 6 гектар, «Ярыш», «Раевка» колхозы һабансылары 3-әр гектар сиҙәм күтәрҙеләр.

Партия тормошо

Партия ойошмаһы һәм колхоздың общественный хужалығы

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын үтәү өсөн көрәшеп, Яңауыл районының «Коммунар» колхозы үткән ауыл хужалығы йылын уңышлы тамамлауға өлгәште. Сәсеү һәм урожай йыйыу эштәре ваҡытында үткәрелде, баҫыу эштәренең сифаты яҡшырҙы. Һөҙөмтәлә, урожайлыҡтың государство планы арттырып үтәлде. Игендең дөйөм йыйымы 1940 йылға ҡарағанда — 5 мең һәм 1946 йылға сағыштырғанда 6 мең центнерға артыҡ булды. Был государствоға пландан тыш 9 мең бот иген тапшырырға мөмкинлек бирҙе. БАССР Верховный Советы депутаты иптәш Файзуллина етәкселек иткән бригада күк һағыҙ үҫтереү планын 220 процентҡа үтәне һәм колхозға 58 мең һумдан артыҡ доход килтерҙе.

Намыҫлы хеҙмәттәре өсөн 16 колхозсы ордендар һәм медалдәр менән наградланды.

Колхоздың общественный хужалығын үҫтереүҙәге был уңыштар тәүге партия ойошмаһының (секретары иптәш Заманов) дөрөҫ етәкселегенең һөҙөмтәһе булып тора. Партия ойошмаһы 21 коммунисте берләштерә. Шуларҙан 10 коммунист туранан-тура баҫыусылыҡ бригадаларында эшләй. Улар эштә гүзәл өлгө күрһәтәләр һәм башҡа колхозсыларҙы ла фиҙакәр хеҙмәткә ойошторалар. ВКП(б) члендәренән Насибуллин, Садриев, Даутов һәм Хәйҙарин иптәштәр айырыуса яҡшы эш күрһәткестәре бирәләр.

Социалистик ярышты ойоштороу, алдынғыларҙың эш методтарын пропагандалау менән партия ойошмаһы көндәлек етәкселек итә. Ҡыҙыу эш ваҡытында бригадаларҙың, звеноларҙың һәм һәр бер колхозсының эшенә йомғаҡ яһала. Алдынғыларҙың эш өлгөләре стена газеталарында, «боевой листоктарҙа», күргәҙмә таҡталарында һәм «молнияларҙа» сағылдырыла. Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ булдырылған. Ул ярышта еңеүсе бригадаларға, звеноларға бирелә.

Партия ойошмаһы, колхоз правленияһы менән берлектә, һәр ай һайын эшкә йомғаҡ яһай. Социалистик ярыш нигеҙендә эшләү һөҙөмтәһендә яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек уңышлы тамамланды. Колхоз баҫыуға сығырға бөгөндән әҙер.

Партия ойошмаһы колхозсылар араһында агитацион-массовый эште ауыл эшсәндәре алдына ҡуйылған ҙур бурыстарҙы үтәү маҡсатына яраҡлы, йүгонтәлә итеп ойошторған. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең Февраль Пленумы ҡарары, Алтай крайы игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хаты һәм Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларының мөрәжәғәте колхозсыларға эҙмә-эҙлекле рәүештә аңлатыла. Уҡытыусы иптәш Сөләйманов колхоздың иң яҡшы агитаторҙарынан иҫәпләнә. Ул йөкмәткеле, аңлайышлы беседаларында халыҡ-ара хәлде, алдынғыларҙың эш тәжрибаларен, көндәлек яңылыҡтарҙы ентекләп төшендерә. Бына шуға күрә уны ауылда ҡарттар ҙа, йәштәр ҙә яраталар, үҙҙәренең яҡын дуҫы һәм кәңәшсеһе итеп хөрмәтләйҙәр. Башҡа агитаторҙар большевистик дөрөҫлөк һүҙен пропагандалау оҫталығына иптәш Сөләймановтан өйрәнәләр.

Партия ойошмаһының инициативаһы менән колхоздың биш йыллыҡ планы төҙөлгән. Был план нигеҙендә эшләп, колхоз тирмән, таҡта ярыу цехы, иген киптергес һәм кирбес заводы төҙөнө. Быйыл клуб, телефон коммутаторы эшләнәсәк. Колхоз 10 баҫыулы сәсеү әйләнешенә күсә, яңынан 120 гектар сиҙәм ерен үҙләштерә.

Шуның менән бергә, партия ойошмаһының хужалыҡ эшенә етәкселегендә ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә бар әле.

Колхоздың общественный хужалығын үҫтереү һәм нығытыу — ауыл хужалығы артеле Уставын ерөнә еткереп эшләүгә ныҡ бәйләнгән. Партия ойошмаһы был мөһим мәсьәләгә тейешле иғтибар бирел еткермәй. СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү саралары тураһындағы ҡарарын аңлатыу эше етерлек ойошторолмаған. Ауыл хужалығы артеле Уставын ерөнә еткереү, колхозсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу тураһындағы мәсьәләләр партия йыйылыштарында ла тикшерелмәй. Шул арҡала колхозда артель Уставын боҙоу фактылары бар.

Малсылыҡ — артель хужалығының артта ҡалыусы участкаһы булып тора. Баҫыусылыҡ буйынса колхоз һуғышҡа тиклемге кимәлде үтеп киткән булһа ла, мал һаны һәм уның продукты биреүсәнлеге 1940 йылға ҡарағанда күп түбән. 1947 йылда мал һанын үҫтереү планы үтәлмәне. Быны төп сәбәбе — партия ойошмаһының малсылыҡҡа икенсе дәрәжәләге эш итеп ҡарауында. Коммунистар малсылыҡ фермаларында эшләмәйҙәр. Малдарҙы тәрбиәләүҙе яҡшыртыу һәм был эштәге тәртипһеҙлек, хужаһыҙлыҡты бөтөрөү өсөн партия ойошмаһы көрәш алып бармай.

Партия ойошмаһы правленияның эшмәкәрлегенә контролде көсәйтергә, председателдең, бригадирҙарҙың, ферма мөдирҙәренең отчеттарын йыйылыштарҙа күберәк тыңларға тейеш. Шул уҡ ваҡытта коммунистар билдәләнгән сараларҙың үтәлешен тәьмин итеү өсөн правлениеға яҡындан тороп ярҙам итергә бурыслылар.

Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү бөтә партия ойошмалары өсөн серьез һынау булып тора. Колхозды хужалыҡ-ойоштороу яғынан артабан нығытыу шуға бәйләнгән. Шуның өсөн партия ойошмаһы колхозсыларҙың бөтә көсөн сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылғы яҙғы сәсеүен уңышлы үткәреүгә тупларға тейеш.

А. Сәмиғуллин,
ВКП(б) Өлкә Комитеты инструкторы.

Район партия мәктәптәренә даими етәкселек кәрәк

Беҙҙең республикала 2044 кешене эсенә алған 76 партия мәктәбе эшләп килә. ВКП(б) райкомдары киске партия мәктәптәре өсөн тейешле шарттар тыуҙырған һәм уларҙы әҙерлекле пропагандистар менән тәьмин иткән райондарҙа политик мәктәптәр яҡшы эшләп киләләр. Миҫал өсөн Кушнаренко районын алырға мөмкин. Был районда киске партия мәктәбе 1947 йылдың октябрендә ойошторолоп, уға райондың етәксе партия, совет работниктарынан 25 кеше йәлеп ителде. Мәктәптең занятиелары икешәр сәғәттән аҙнаға 2 тапҡыр регуляр рәүештә үткәрелеп барыла. Лекцияларҙың һәм беседаларҙың сифатын яҡшыртыуға ҙур иғтибар бирелә. ВКП(б) тарихын райкомдың парткабинеты мөдире иптәш Тимофеев уҡыта. Ошо көндә «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсының» XI главаһы үтелә. Иптәш Тимофеевтең үтелгән бөтә материалдар буйынса конспекте бар. Уның лекциялары уҡыусыларға еңел аңлашыла һәм шул уҡ ваҡытта йөкмәткеле булалар. Ул лекцияларында карта, альбом кеүек күргәҙмә пособиеларҙы урынлы файҙалана белә.

Партия һәм совет эше мәсьәләләрен райкомдың беренсе секретары иптәш Бердин уҡыта. Уның да лекцияларын уҡыусылар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлайҙар.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, партияның ҡайһы бер райкомдары киске партия мәктәптәренә тейешле иғтибар бирмәйҙәр, уларға тейешле шарттар тыуҙырмайҙар. Миҫалға Өфө ауыл райкомын күрһәтеп була. Бында киске партия мәктәбе 1946 — 1947 уҡыу йылында ла насар эшләне, унан һуң ул таралды һәм 1947 йылдың аҙағында яңынан ойошторолдо. Партия мәктәбе быйыл да ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләй. Уның эше хаҡында ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһының ҡарары булыуға ҡарамаҫтан, райком киске партия мәктәбенең эшен яҡшыртыу тураһында һис бер сара күргәне юҡ.

Бындайҙар рәтенә шулай уҡ Бөҙәйәҙ районы киске партия мәктәбен индерергә кәрәк. Ул да ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләй. Уҡыусылар, уҡытыусылар араһында дисциплина йомшаҡ, шул арҡала занятиелар бик йыш өҙөлә. Партия төҙөлөшө иң бары 6 сәғәт кенә үтелгән. Был фактылар ВКП(б) райкомы һәм уның пропаганда, агитация бүлеге работниктарының партия мәктәбе эшенә етәкселек итмәүҙәре, уның эшен үҙ яҙмышына тапшырып ҡуйыуҙары тураһында дөрөҫ...әр.

Х. Вафина.

Алдынғыларға тиңләшеү — металлургтарҙың почетлы бурысы

Белорет металлургтары биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн төҙөлгән ойоштороу-техник саралар планында «алдынғы металлургтарға тиңләшергә» тигән пунктты ла индерҙеләр. Ул алдынғылар иҫәбенә домна цехының Иван Векяков, мартен цехының тиҙләтелгән метод менән ҡорос иретеү оҫталары орденле Вениамин Хлесткин, Хәсән Шәрәфетдинов, ҡорос-сыбыҡ станының смена мастеры Г. Ляпин, өлкән вальцовщик В. Павочкин, вальцовщик Н. Игиташев, Тирлән листопрокат заводының өлкән вальцовщигы А. Чертихин иптәштәр инәләр. Уларҙың намыҫлы хеҙмәте сталинсе биш йыллыҡтың икенсе йылында пландан тыш меңдәрсә тонна сүйын, ҡорос, прокат һәм табаҡлы тимер эшләп сығарыуҙы тәьмин итте.

Был алдынғы кешеләрҙең тәжрибәләрен өйрәнеү буйынса цехтарҙа производство кәңәшмәһе үткәреү графиктәре төҙөлгәйне. Март айында цех коллективтәренең производство кәңәшмәләрендә улар үҙҙәренең эш тәжрибәләре тураһында беренсе тапҡыр сығыш яһанылар. Иптәш Хлесткиндең мартен мейесе төбөнән һәр квадрат метрынан планға ҡарағанда 12 процентҡа күберәк ҡорос алыуы тураһында, иптәш Шәрәфетдиновтың ҡорос иретеү процессын 10 сәғәт урынына 5 сәғәт 45 минутта үткәреүе тураһындағы тәжрибәләре айырыуса ҡыҙыҡһындырыу тыуҙыра.

Алдынғылар миҫалында эшләүҙе ойоштороу өсөн металлургтар комбинат етәкселәре алдына конкрет бурыстар ҡуялар. Беренсе нәүбәттә уларҙың талабы яғыулыҡ һәм шихта материалдары менән үҙ ваҡытында һәм тулыһынса тәьмин итеүгә ҡайтып ҡала.

Шуларҙан сығып комбинат етәкселеге домна цехының руда дворы эшен үҙгәртеп ҡороу (скреперҙар установкаһы ҡуйыу), икенсе номерлө домна мейесенә шихта материалдары бирел тороу өсөн мотовоздарҙы эксплоатацияға тапшырыу сараларын билдәләне. Мартен цехында өсөнсө завалка машинаһы эксплоатацияға тапшырыла. Тирлән листопрокат заводында табаҡлы тимер клёталарының технологияһы үҙгәртеләсәк. Был сара хеҙмәт етештереүсәнлеген 25 процентҡа күтәреүгә мөмкинлек бирә.

Социалистик ярыш алдынғыларының — алдынғы цехтарҙың, участкаларҙың, агрегаттарҙың һәм иң яҡшы кешеләрҙең өлгәшеүҙәрен һәм тәжрибәләрен киң файҙаланыу, бөтә металлургтарҙы ла алдынғыларға тиңләштереү — беҙҙең почетлы бурысыбыҙ булып тора.

М. Кузнецов,
Белорет металлургия комбинатының хеҙмәтте ойоштороу бүлеге начальнигы.

Беренсе урында

Ишембай нефть эшкәртеү заводының начальнигы иптәш Тимофеев булған цех коллективы эш темпын айҙан-айға күтәрә бара. Әгәр февраль айында цех производство планын 122 процентҡа үтәһә, март айында уны 131 процентҡа үтәне. Ә апрель айында көндәлек задание үтәлеше тағы ла юғарыраҡ.

Оператор Мелькина, шулай уҡ Лукьянчикова, Конченко, Осипова иптәштәрҙең сменалары айырыуса юғары күрһәткестәр бирәләр.

Цехта һәр бер эшсе юғарылатылған йөкләмә алды һәм уны намыҫлы рәүештә үтәй. Тотош цех йөкләмәһе айға ике тапҡыр, ә смена йөкләмәһе һәр көн тикшерелеп барыла һәм һәр бер эшсегә еткерелә. Уларҙың һөҙөмтәләре кадрҙарҙы өйрәтеүгә, продукцияның сифатын күтәреүгә, эш урындарын таҙа тотоуға, пар, электр энергияһын экономиялауға ҡарап билдәләнә.

Был цех тотошо менән стахановсы цехҡа әүерелде һәм биш ай инде заводта беренсе урынды алып килә. Коллектив Беренсе Май байрамын достойно ҡаршылауға әҙерләнә.

К. Хәмитов.

Алдынғылар

Май алды ярышының өлгөлө йомғаҡтары тураһында Башҡорт АССР-ы аҙыҡ промышленносе Министерствоһының Өфө ҡалаһындағы аҙыҡ-түлек комбинаты директоры иптәш Д. Н. Лищенский беҙгә түбәндәгеләрҙе хәбәр итте:

— Беҙҙең коллектив систематик рәүештә ритмлы эшләү һөҙөмтәһендә производство планын үҙ ваҡытында үтәп килә. Ағымдағы йылдың беренсе квартал планын, ваҡытынан 12 көнгә алда, 100 процентҡа үтәне. Апрель айында беренсе квартал планына йомғаҡ яһау өсөн бөтә коллектив ҡатнашлығы менән кәңәшмә үткәрелде. Унда цех начальниктәре Арысланов, Бикмөхәмәтова иптәштәр квартал планын срогынан элек үтәү менән рухланып, май алды социалистик ярышында 5 айлыҡ планды 4 айҙа үтәү тәҡдимен индерҙеләр.

Коллективтың һүҙе эштән айырылманы. 5 айлыҡ план 4 айҙа, срогынан 6 көн элек, 23 апрелгә 100 процентҡа үтәлде. Хәҙер коллектив май айы иҫәбенә пландан тыш продукция бирә.

Матбуғат күҙәтеү

„Оскон" газетаһының серьез етешһеҙлеге

«Оскон» газетаһы (ВКП(б)-ның Әбйәлил райкомы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы башҡарма комитеты органы) үҙенең 8 февралдә сыҡҡан номерындағы «Колхоз партия ойошмаларының мөһим бурыстары» тигән башмәҡәләһендә былай тип яҙҙы:

«...Партия ойошмалары политик яҡтан тәрбиәләү эшен өлгөлө ойошторорға тейештәр. Сөнки коммунист — ул массаларҙың политик етәксеһе».

Газета артабан партия ойошмаларын «колхозсылар араһында политик тәрбиә эштәрен алып бармайҙар» тип тәнҡитләне һәм уларҙы «яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы үткәреүгә бөтә колхозсыларҙы мобилизовать итергә» саҡырҙы.

Партия ойошмаларына бик урынлы талап ҡуйылған. Колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктары араһында политик эште яҡшыртҡанда һәм ауыл эшсәндәренең социалистик аңлылығын ҡырҡа күтәргәндә генә ауыл хужалығы алдында торған ҙур бурыстарҙы уңышлы хәл итергә мөмкин. Был эштә газета үҙе тәүге партия ойошмаларына өлгө күрһәтергә, уларҙы большевистик тогро һүҙҙе массаға еткереүҙең форма һәм методтары менән ҡоралландырыуҙа ярҙам итергә тейеш ине.

Ләкин «Оскон» редакцияһы работниктарының хәтерҙәре насар, күрәһең. Газета партия ойошмаларына «бойороҡ» бирҙе лә, шуның менән тынысланып ҡалды. Уның биттәрендә районда массовый-политик эштең торошон яҡтыртҡан йөкмәткеле бер генә хәбәр ҙә басылмаған.

«Совхоз сәсеүгә әҙерләнә» тигән хәбәрҙә:

«Совхоз партия ойошмаһындағы 33 коммунистың 22-һе туранан-тура производствола эшләйҙәр. Улар, бер үк ваҡытта, эшселәр араһында политик-агитация эштәрен алып баралар. 18 коммунист агитатор булып эшләй, 2-һе политик түңәрәк менән етәкселек итә», — тип яҙыла.

Был хәбәргә ҡарағанда Иҙргел совхозы «яҙғы баҫыу эштәренә яҡшы әҙерләнгән». Ләкин партия ойошмаһы быға ниндәй юлдар менән өлгәшкән? Агитаторҙар нисек эшләйҙәр? Газета был турала әйтмәй.

«Оскон» газетаһының материалдарында фактылар [illegible], ә уларға анализ яһалмай, политик баһа бирелмәй, шул нигеҙҙә тейешле һығымта эшләнмәй. Шуға күрә, улар тешһеҙ булып сығалар.

«Оскон» газетаһының биттерендә партия ойошмаларының секретарҙары, агитколлектив етәкселәре, тәжрибәле агитаторҙар һәм ауылдың башҡа культура көстәре сығыш яһамайҙар. Был хәл газетаның районды тулы тормошо менән бергә йәшәмәүен, партия работниктары һәм рядовой коммунистар менән ныҡлы бәйләнеш тотмауын күрһәтә.

Районның культура-ағартыу учреждениелары ла хеҙмәтсәндәрҙе тәрбиәләүҙә һәм ауылда социалистик ярышты ойоштороуҙа ҙур роль уйнарға саҡырылғандар. Шуға күрә лә, культура-ағартыу учреждениеларының эштәрен яҡтыртыуға газетала киң урын бирелергә тейеш ине. Газета был тангалдә лә борола алмаусылыҡ күрһәтә. Ул районда «культура-ағартыу учреждениеларының эшен яҡшыртыу айлығы үткәрелеүе» айҡанлы ике хәбәр баҫып сығарҙы ла, шуның менән тынысланып ҡалды. «Ял итеү ваҡыты(!) ойошторолмаған», «Клуб эшләмәй» тигән был ике хәбәр бер-береһенә ике тамсы һыу шикелле оҡшағандар. Улар бик өҫтән генә яҙылғандар, клубтарҙың эштәрендәге төп етешһеҙлектәргә асыҡ бирмәгәндәр һәм уларҙың эшен яҡшыртыу юлдарын күрһәтмәйҙәр. «Ял итеү ваҡыты ойошторолмаған» тигән хәбәргә ҡарағанда:

«Ауылдың клубы эшләмәй, уның тәҙрә быялалары ватыҡ, эсендә плакат, лозунгылар юҡ, ултырғыстар етешмәй».

Ә «Клуб эшләмәй» тигән хәбәрҙә:

«Клубтың тәҙрәләре ватыҡ, мейесе емерелгән, [illegible]», тип яҙыла.

Был мөһим эшкә кампания [illegible] ҡарау фактын тик генә газетаһының серьез хатаһы булып тора.

Әбйәлил районындағы тәүге партия ойошмаларының «колхозсылар араһында политик тәрбиә эштәрен алып бармауҙары» [illegible] «Оскон» газетаһы [illegible]. Сөнки ул, массовый-политик эште киң йәйелдереп, хужалыҡ эштәрен уңышлы үткәреүгә «бөтә колхозсыларҙы мобилизовать итергә» [illegible] партия ойошмаларына [illegible] ярҙам күрһәтмәй.

«Оскон» газетаһы ауылда массовый-политик эште яҡтыртыуға [illegible] иғтибар итергә тейеш.

Комсомолецтарҙан лекторҙар группаһы

Мәскәү нефть институтының Черниковск ҡалаһындағы филиалы эргәһендә комсомол комитеты алдынғы студенттарҙан лекторҙар группаһы ойошторҙо. Хәҙергә көндә комсомолецтар Коноплянникова, Шакиров, Шекунова, Подковырова, Чуманов һәм башҡа иптәштәр төрлө темаларға лекциялар әҙерләп башланылар.

Шулай уҡ комсомолецтарҙан 50 кеше аҙнаһына бер тапҡыр участкаларҙа халыҡ араһында агитация эшен дауам итәләр.

В. Памирский.

Советтәр Союзында



Кемерово өлкәһе, Сталин исемендәге Кузнецк металлургия комбинаты СССР Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙендә тота. Домна цехы 1948 йылдың тәүге көндәренән үк пландан тыш сүйын бирә.

Һүрәттә: 1-се номерлө домна мейесе.

В. Лещинский фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

„Урман аҙнаһы"

СССР урман хужалығы Министерствоһының ҡарары буйынса быйыл бөтә ерҙә «урман аҙнаһы» үткәреләсәк. Был кампанияның төп бурысы — ҡалаларҙы, посёлкаларҙы һәм юлдарҙы йәшелләндереү, парктар төҙөү, баҫыуҙарҙы һаҡлаусы урман полосалары булдырыу, ағас үҫтереү эшенә халыҡты ылыҡтырыу тора.

«Урман аҙнаһы» Үзбәкстанда уңышлы үтте. Унда йөҙ меңләгән хеҙмәтсән ҡатнашты. 20 миллиондан артыҡ ағас ултыртылды. Самарҡанд, Бохара, Ташкент, Андижан һәм башҡа ҡалалар урамдары йәшелләндерелде. «Үзбәк диңгеҙе» ярына 200 гектарҙан артыҡ ағас ултыртылды.

Молдавияла ла эштәр киң рәүештә йәйелдерелде. Бында юл буйҙарын һәм баҫыуҙарҙы һаҡлаусы урман полосалары булдырыу эштәре башланды. Тирасполь-Слободзея трассаһында 40 километр майҙанда йәш ағастар ултыртылды.

Воронеж өлкәһендә «аҙнаның» беренсе көндәрендә 370 гектар ағас ултыртылды. Апрелдең икенсе яртыһында «урман аҙнаһы» Эстонияла һәм Мәскәү өлкәһендә башланасаҡ.

Башҡаланың төньяҡ йылға портында

Яҙғы яҡты ҡояш Химки («күле») тулҡындарында уйнай. Ул күптән түгел генә боҙҙан арынды. Уларҙа Волга буйы ҡалалары өсөн [illegible] тонна йөктәр урынлаштырыла.

Башҡаланың төньяҡ йылға порты [illegible] Мәскәү [illegible] Горький ҡалалары араһында йөрөйәсәк. Был навигацияла регуляр йөк юлдары: Мәскәү — Ленинград, Мәскәү — Астрахань, Мәскәү — Молотов һәм башҡа юлдар асыласаҡ. Ошо көндәрҙә пароходтар [illegible]. Пассажирҙар өсөн [illegible] ваҡыты [illegible] башланасаҡ.

607-се номерлө ҙур баржа [illegible]. 402-се номерлө үҙе йөрөй торған баржа [illegible].

Семьялы кешеләр өсөн ял йорто

КУРСК. (ТАСС). Оскол йылғаһы буйында ҡарағай урманда «Красная поляна» ял йорто [illegible] тамамланды. [illegible] Ял итеүселәр [illegible] булмаясаҡ.

Семья менән ял итеү йортона барырға теләүселәр бик күп. [illegible]

Яңы электромагнит

Мәскәүҙең Киров исемендәге «Динамо» заводында ҙур электромагнит төҙөү [illegible] тамамланды. [illegible]

Был ойошмаға [illegible] Советтар Союзында беренсе тапҡыр эшләнде.

[illegible] завод конструкторҙары — инженер А. Кречинский һәм техниктар Бурыгин һәм Солдатов [illegible].

Молдавия ССР-ы Слободзей районындағы балалар консультацияһы уңышлы эшләй. [illegible] 600 баланы хеҙмәтләндерә. [illegible]

Һүрәттә: Консультация мөдире М. Прохорова Глинное ауылынан [illegible] Г. Е. [illegible].

А. Батанов фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Үзбәкстанда ашлыҡтар башаҡ сығара

ТАШКЕНТ. (ТАСС). Самарҡанд, Кашка-Дарья, Ташкент өлкәләрендә көҙгө сәсеүле арпа башаҡ сығара. «Кок-Арал» совхозындағы айырым массивтарҙа арпа [illegible].

Үзбәкстандың бөтә райондарында ла [illegible] бик яҡшы. Колхозсылар урожай йыйыуға әҙерләнәләр. [illegible] башланасаҡ.

Яңғыра, яҙ йыры - хеҙмәт йыры!

СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланған ауыл хужалығы алдынғыларынан бер төркөм.

Һүрәттә: (һулдан уңға) түбәнге рәттә— Н. Шафиков (Туймазы районы, «Булаҡ тау» колхозы), Х. Хәсәнова (Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы), Ф. Хәсәнова (Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы), Х. Ғәбдрахмәнов) (Туймазы районы, «Булаҡ тау» колхозы) һәм юғары рәттә — Ә. Хәсәнова (Ҡырмыҫҡалы районы, «Иҙел» колхозы), Ғ. Байгилдина (Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозы), Ш. Байков (Бүздәк районы «Сулпан» колхозы).

В. Жданов фотоһы.

С. КУЛИБАЙ

Баҫыуҙа

Мәғәнәһе хаҡ, ҙур һәм көслө хикәйәттең
Асҡан кеүек тәүге битен,
Бына ҡояш нуры йәнә асып китте
Ҡар ябыулы баҫыу өҫтөн.
Көн башлана. Һыҙылып килә яҙҙың таңы,
Беҙәп көмбәҙ күктең түбәһен,
Төҫһөҙ, көсһөҙ быҙлай бары «Тимер ҡаҙыҡ»,
Ә юлдарҙа гөрләй көрәш.
Алтын некта һәм биҙәктәр һүнде күктә
Һәм йыр башланы буҙ тургай,
Ошо миҙгел баҫыуында һәр хеҙмәткәр
Дәртле, ҙауҡлы йырҙы тыңлай.
«Изге тупраҡ, ҡәҙерлем!», тип иркен һулай
Бәхетле һәм мәғрур хужа.

Ерем буйлап, тигеҙ итеп бураҙналап,
Ул, нәҡ бәрхет, таҫма һуҙа.
Һәм яланды ҡаймалап ул саф бәрхеттән,
Йәйеп һалды яңы келәм,
Сигеү сигеп матурланы ул еңтекләп,
Хеҫтәрле үҙ ҡулы менән.
Бар йылыһын бирер ҡояш ошо ергә
Һәм һибәләп ямғыр яуыр.
Был һоҡланғыс баҫыу ине киңлегенә
Ҡанат кирен ҡалҡыр йәйғор.
Һәм был баҫыу тулҡынланыр дәрья булып,
Бәхет, шатлыҡ һаман балҡыр.
Ерҙе, тормошто йәмләп шундай уңыш
Даңға күмер хеҙмәт халҡын.

—☆—

Т. АРСЛАН

Яҙ килә

Тамсы тама, һыуҙар аға
Сана эҙенә тулып,
Яҙ килә, тыныс яҙҙарҙың
Өсөнсө яҙы булып.
Ике яҙ элек, һуғышлы
Ҡырҙарҙы үтә инек,
Тыуасаҡ тыныс яҙҙарҙы
Һағынып көтә инек.
Яҙ килә тинһеҙ бәхеттәр
Бүләкләп күңелдәргә,
Ул шиғыр булһын шағирға
Һәм шағир түгелдәргә.
Ҡар һыуы шаулай, сыуаҡ яҙ
Ерҙе балҡытып килә,

Ул килә байлыҡ аңҡытып,
Шатлыҡ аңҡытып килә.
Баҫыуҙар, ҡырҙар өҫтөнә
Тартайыҡ илдең көсөн,
Яҙ килә бөйөк биш йылды
Дүрт йылда үтәү өсөн.
Яҙ ергә төшкән бөртөктәр
Көҙ—мең бөртөккә артһын,
Колхозда хеҙмәт көндәре
Һигеҙәр кило тартһын.
Яҙ килә шаулап, тулҡынлап,
Илдең туҡлығы булып,
Ғүмерҙең шатлығы булып,
Сикһеҙ ныҡлығы булып!

Д. ИСКӘНДӘРОВ

Хеҙмәт батырҙарына

Яҙғы ташҡын булып йыр яңғыраһын
Илдең батырҙары хаҡына,
Тағы ҡайҙа шундай маҡтау бар һуң
Ябай, тырыш хеҙмәт халҡына!
Һалдат һуғышҡанда Сталинград өсөн
Бына шундай көндә һағыҡты,
Ғалимдең һәм колхозсының көсө

Һәр бер бөртөк өсөн һалыпһыҡ.
Хәҙер гөрһөлдәмәй ауыр туптар,
Һуғыш даны — эштә аҡлана,
Беҙҙең ҡырҙар бирган мул уңыштан
Ватан ныҡый, Ватан маҡтала,
Яңы еңеүҙәргә, республикам,
Быйыл да мул уңыш алыһың,
Иген менән биҙәп үҙ намыҫың
Ватан да, халҡ та данланһын!

—☆—

Хеҙмәт юғарылығына

2 апрель... Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларын наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указ ҡабул итте: 11 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме, 793 кешегә ордендәр һәм медалдәр бирелде.

804 батыр! Былар эсендә МТС директоры Павлов, агроном Нестеров, механик Тарасенко, трактор бригадаһы бригадиры Алехин, звеновод Батырова, баҫыу бригадаһы бригадиры Стоянов, колхозсы Рысбаев, ВКП(б) райкомы секретары Масленников, газета редакторы Суфиянов һәм башҡалар бар.

Төрлө хеҙмәттәге, төрлө квалификациялы кешелар! Ләкин улар бөтәһе лә бер үк фронт һалдаттары — иген өсөн көрәшселәр.

— Дан һеҙгә, маҡтау һеҙгә, иптәштәр! — тибеҙ беҙ уларға.

Ысын йөрәктән әйтелгән был һүҙҙәр республикабыҙҙың бөтә мөйөштәрендә, берҙәк, рәхмәт һүҙҙәре, икенсенән, саҡырыу һүҙҙәре булып яңғырайҙар.

— Өлгәшеүҙәрҙе өлгәшеүҙәргә ҡабатларға! — саҡырыу һүҙҙәренең эстәлеге шундай.

Башҡортостан большевиктәренең XXI өлкә конференцияһы:

«...ВКП(б) Үҙәк Комитеты Февраль Пленумының һуғыштан һуң ауыл хужалығын күтәреү тураһындағы ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн беҙҙең республика эшсәндәренең бөтә көсөн мобилизацияларбыҙ, тип һеҙҙе, иптәш Сталин, ышандырабыҙ!»,—тип даһиға һүҙ бирҙе. Был беҙҙең һүҙебеҙ, республика һүҙе.

1948 йыл ауыл хужалығын үҫтереү биш йыллыҡ планын уңышлы үтәү өсөн көрәштең хәл иткес йылы. Был йылда еңеү — 1949 йылда иген етештереүҙең валовой йыйымын һуғышҡа тиклемге кимәлгә еткереү һәм биш йыллыҡ аҙағына уны үтеп китеү, тигән һүҙ! Был йылда еңеү — ауыл хужалығы культураларының сәсеү майҙанын 433 мең гектарға арттырып сәсеү, тигән һүҙ! Был йылда еңеү — арыштың һәр гектарынан, Социалистик Хеҙмәт Геройы Насыров Ғиниәт алған тиклем, 30 центнер арыш алыу өсөн көрәшеү, тигән һүҙ!

Быйылғы яҙ ошо һүҙҙәрҙе аҡлау яҙы булырға тейеш. Бының материаль нигеҙҙәр бар. 1947 йылда Башҡортостан 700 трактор алды, 1948—49 йылдарҙа ул тағы ла 5300 трактор аласаҡ. Партия һәм хөкүмәт беҙҙең республикабыҙға өҙлөкһөҙ ярҙам итеп торалар. Партияның ирке менән беҙҙең 4.370 колхозға 7.156 мең гектар ер мәңгегә беркетелде. Беҙҙә юҡҡа ғына;

— Күгәрсен булып гөрләйем.
Совет биргән ерҙәрҙә!.. — тип йырламайҙар.

Элекке Өфө губернаһында йәмәүсе 53.338 хужалыҡ бөтөнләй ерһеҙ булған. Улар байҙарға эшләп тамаҡ туйҙырғандар. Ул заманда йырҙарға:

— Байға хеҙмәт итеп кем ярай?,— тигән һыҡтаулы һорау ҡушып йырлағандар.

Хәҙер улай түгел. Беҙҙең еребеҙ үҙебеҙҙеке. Беҙҙең хеҙмәтебеҙ үҙебеҙ өсөн, илебеҙ өсөн.

Яҙ килә! Юғары урожай өсөн көрәш көндәре етә. Беҙ был һынау ваҡытында Ватаныбыҙ алдында бурыслы булып ҡалырбыҙмы? Юҡ! Беҙ, ауыл хужалығы алдынғылары өлгөһендә, яҙғы сәсеүҙе ваҡытында һәм сифатлы итеп тамамларбыҙ.

Бураҙналар тура ярылырҙар, һабанлар тәрән һөрөрҙәр, тырмалар тетеп тырматырҙар, сәскестәр сифатлы сәсерҙәр. Май алды ярышында баҫыу алда барыр, алтайлылар мөрәжәғәтенә баҫыу доҫтоҡ яуап бирер. Башҡортостандың утыҙ йыллығын колхоз мул урожай алып ҡаршылар.

Ватан өсөн, уның артабан ныҡыуы өсөн хеҙмәт юғарылығына!

Һәм көҙ килер. Беҙҙең буралар тулы иген булыр. Мул хеҙмәттең емеше баһаланыр — беҙҙең геройҙар һаны, орденлеләр сафы тағы ла артыр.

Совет ысынбарлығы шуға илтә.

Ә. Ихсан.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордено менән наградланған ауыл хужалығы алдынғылары.

Х. М. Мөрсәлимова — Бүздәк районы «Сулпан» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 8 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,2-шәр центнер бойҙай урожайы алды.

С. Я. Мөрсәлимова —Бүздәк районы «Сулпан» колхозының звеноводы. Уның звеноһы 1947 йылда 5 гектар майҙандың һәр гектарынан 22,6-шар центнер арыш урожайы алды.

ӘКРӘМ ВӘЛИ

Күтәрегеҙ, дуҫтар, баҫыу киңлектәрен!

Ҡояш нуры диңгеҙ булып
Аҡҡан төҫлө,
Һары алтын ергә тулып
Ятҡан төҫлө,
Баҫыуҙарҙы талғын елдәр
Тулҡынлатыр,
Икмәк өсөн туҡ игендәр
Бөркөп ятыр.
Ташҡын булып ағыр тағы
Аҡаҡ бөртөк,
Төҙәлешкә нигеҙ ташы
Булыр һәр йөк.
Туймазы ла бөгөн асҡан
Фонтан кеүек,
Яңы юлдәр тауҙар аша
Һалған кеүек,
Конвейерҙан ҙур танкылар
Төшкән һымаҡ,
Һәм сиктәрҙә нығытмалар
Үҫкән һымаҡ, —
Булыр беҙҙең ҡырҙа еңеү.

Дан алырҙар,
Һуғыштарҙа енгән кеүек.
Ҙур батырҙар.
Байрам булып килһен өсөн
Ошо көндәр,
Шатлыҡ нурын һипһен өсөн
Бөтә йөҙҙәр,
Күтәрегеҙ, дуҫтар, баҫыу
Киңлектәрен,
Бәрхет һымаҡ булып ятһын
Ерҙең тәне.
Иыр шикелле ныма барһын
Эштәрегеҙ.
Шул байрамда орден алһын
Күптәрегеҙ.
Гөрләтегеҙ, ҡыр күкрәһен
Төн дә көндеҙ,
Биҙәр Геройҙың күкрәген
Алтын йондоҙ!

Апрель, 1948.

—☆—

НАЗАР НӘЖМИ

Яҡты яҙ

Быуланға ер, ҡайнар икмәк һымаҡ,
Йылыһында ҡояш нурының.
О яҡты яҙ! Сафлығында һыулай
Күпме яңы ғүмер тыуыуы.

Киткән ҡоштар ҙа бит һинә ҡайта,
Күпме өндәр биҙәй ер өҫтөн.
Шиңгән гөлдәр ҡабат сәскә ата,
Һиндә илһам, һиндә йыр көсө.

Ярҙарына һыймай йылғалар ҙа,
Күңел ярһый ташҡын һыу кеүек...
Киң ҡырҙарҙа байлыҡ булып тама

Орлоҡтарҙың һәр бер бөртөгө.
Һәр бөртөктә беҙҙең хеҙмәт йәшәй —
Һинең хеҙмәт, иптәш, минең дә.
Улар башта, ергә төшмәҫ борон.
Шатлыҡ булып шыта күңелдә.

О яҡты яҙ! Һәр бер бураҙнала,
Һулышында йәшәү йәме бар.
Ерҙе алтынға маңған батырҙарға
Алып кил һин тағы яңы дан!

1948.

ЯҘҒЫ ИРТӘ

Сикһеҙ бөйөк һәм, шуға күрә, онотолмаҫ — апрель көнө. Ҡояш, һыуланым буҫай, тиган һымаҡ ҡыҙарып, алыҫтағы тау артынан күтәрелде.

Тау итәгенә һыйынып, горизонтҡа барып тоташҡан Татарстан ялан...дарына йөҙө менән ултырған «Фрунзе» колхозы ҡояш менән бергә торҙо һәм һаллат кеүек, ун биш-егерме минуттан, расписание буйынса, эшкә башланы. Көн тыуа, көн менән бергә колхоз хеҙмәт пафосына күмелә. Бөгөн колхоз үҙенең яҙғы эштәргә әҙерлегенә «генеральный репетиция» яһап ҡараясаҡ.

Инде ферма, конюшняларҙа булырға өлгөргән колхоз председателе Биктимер Сөләймәнов протеҙ аяғы менән шығыр-шығыр атлап, правлениегә килеп тә етте. Ул үҙенең ун ике йыл буйы хужа булып эшләү тәжрибәһе арҡаһында бик ҡеҫҡа ғына деталдәрҙе лә күрә, дөйөмләштерә һәм «обстановканы» баһалай белә: Унда командирлыҡ һиҙгерлеге, крәҫтиәнгә хас оҫталыҡ һәм йылдамлыҡ бар.

Уның һәр һүҙе, приказ кеүек, ябай, асыҡ һәм ваҡытында үтәлә. Ул хеҙмәтте шундай оҫта ойошторған, әйтерһең, бөтә эш тармағының пульстары уның ҡулында: ул бөтәһен дә күрә, белә. Бөгөн шундай ат менән кем күпме һөрҙө, кем ҡайҙа һәм нисек эшләй, агитаторҙар ни тураһында һөйләгәндәр, йәки һөйләйәсәктәр һәм башҡалар.

Ул арала счетовод Шакиров Фатих радиоприемникте көйләп ебәрҙе. «Широка страна моя родная» көйөнөң көмөш позывнойҙарына гимн ҡушыла. Гимнды дикторҙың таныш һәм асыҡ тауышы алмаштырҙы. «Указ Президиума Верховного Совета СССР». «Штабтағылар», баштары менән приемникте һөҙөргә телағәндәй, яҡыныраҡ килделәр. Диктор Башҡортостан ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһындағы Указды уҡыны.

Ун бер герой!

Республикала миллионлаған игенсе араһынан тәүге ун бер данлыҡлы исем.

Һәр кемдең йөҙөндә сикһеҙ ҙур шатлыҡ, ғорурлыҡ һәм ҡыҙыҡһыныу күренде. Председатель үҙенең бүлмәһенә инеп, стенала эленеп торған ҡыҙыл рамкалы Дипломды алып сыҡты. Ҡемдәр: «Хәҙер уҡ агитаторҙарҙы йыйырға кәрәк», тине.

— Бер кемде лә йыймайбыҙ. Кисәге наряд һәм көн тәртибе боҙолмай, — тине председатель, ишеккә боролоп, — киттек, киттек. Баҫыуҙа, баҫыуҙа һөйләшербеҙ.

Указ ауылдың бер осонан икенсе осона йәшен тиҙлеге менән барып етте. Хатта километр ярымға ситтә, тау башында ултырған игенсе бригадаға ла был хәбәр, «сыбыҡһыҙ телефон» менән барып, таралған.

Бар халҡ, аттар, үгеҙҙәр, һабаны-тырмаһы, сәскесе баҫыуҙа. Көр аттар кешнәйҙәр, уҙған йыл 406 гектар ер һөргән үгеҙҙәр эре һәм артыҡ тыныс баҫып торалар.

Был «учебный тревогала» комиссия бөтә әҙерлекә, тартыу көстәренең көрләгенә бер генә һүҙ менән баһа бирҙе: «Отлично».

— Бөгөн, — тине Биктимер, — радио ҙур яңылыҡ һөйләне. — Ул ишеткәнен аңлатып бирҙе. — Геройҙар араһында беҙҙең колхозсыларҙың исеме юҡ. Хатта орден менән наградланыусылар араһында ла булмаһаҡ. Ниңә булмаһаҡ?— Ул оҙаҡ пауза яһаны. Һәр кемдең йөҙөнән яуап уҡып сыҡты. Аттарға, үгеҙҙәргә, тауҙарға, Ыҡ йылғаһы буйҙарына ҡарап алды. Әйтерһең, ул быларҙы тәү тапҡыр күрә, йәки күптән күрмәгән. Һорау ҡабатланды: Ниңә юҡ? Еребеҙ насармы? Көсөбөҙ етмәйме? Әллә иген игә белмәйбеҙме, ә? Бына минең ҡулымда 114995 номерле диплом. Уның ҡайҙан һәм ни өсөн алынғанлығын бөтәгеҙ ҙә беләһегеҙ. Ундағы һүҙҙәр ҙә күптән таныш. Ҡайһы-берәүҙәр онотҡан булһа, иҫегеҙгә төшөрәм: «Ике йыл рәттән 168 гектар майҙандағы арыштың һәр гектарынан 17-шәр центнер урожай алған өсөн...». Ун етешәр центнер. Ә беҙ уҙған йыл нисек эшләнек? Хурлап булмай, яҡшы. Тик барыбыҙ ҙа түгел. Ана барсалы яулыҡ бәйләгән Мәрфуға, Кунгурова Клавдия звеноларын бөтәбеҙгә лә примерға ҡуйырлыҡ. Әгәр барыбыҙ ҙа улар кеүек эшләгән булһаҡ, был Указ эсенән берҙе түгел, дүрт герой исемен уҡыған булыр инек.

Председатель һөйләне. Һүҙҙәр йөрәккә ялҡын булып яттылар. Был ялҡын көйҙөрмәне, ә бешерҙе һәм ышаныс оҫҡоно һалды.

Колхоз районда иң алдынғыларҙан һанала. Ә ниңә һуң председатель риза булманы?

Әкмәева Мәрфуға һәм Кунгурова Клавдия звенолары уҙған йыл ун бер гектар майҙандан уртаса 5,7 центнер киндер орлоғо, 15 центнер сүс алдылар.

Колхоз государствоға сүс биреп, тик 1946 йылғы урожай өсөн генә 420 бот арыш, 254 килограмм шәкәр, бик күп тауар алды. Арыш, 1946 йылғыға ҡарағанда, 9 ботҡа, бойҙай 24 ботҡа артығыраҡ урожай бирҙе. Государство бурыстары срогынан элек, арттырып үтәлде. Көҙөн 176 гектар арыш сәселде.

Яҙын, һуғышҡа тиклемгә ҡарағанда, 55 гектарға артығыраҡ бойҙай сәселәсәк. Ҡыш бөтә агротехник саралар ҡулланылды. Малдар көр. Һәр парға өсәр комплект сбруй, тәртә-тәгәрмәс тигәндәр әҙер. Колхозсыларға көҙөн хеҙмәт көнөнә ике килограмға яҡын бөртөклө ашлыҡ, сүс һәм орлоҡ бүленде. Күп баҫыулы система үҙләштерелде. Ерҙе эшкәртеү юғары агротехник сараларҙа бара. Барыһы ла, барыһы ла үҙ урынында. Һәр участка юғары кимәлгә күтәрелгән.

Ләкин коммунист Сөләймәнов ирешелгән уңышлыҡтар менән генә ҡәнәғәтләнеүсе етәксе түгел. Уға һәр көн яңылыҡ булһын, һәр көн подвиг килтерһен. Бына шуға ла ул башҡа колхозсыларҙы ике звено члендәре алдында ҡыҙартты.

Митинг тантаналы вәғәҙә биреү менән осланды. Бригада-бригада менән, звено-звено менән ярыш договорҙарын тикшерҙеләр. Ҡыҫҡырыштылар, бәхәсләштеләр, һынаша, ҡул бирешеп, иртә культуралар сәсеүҙе биш көндә тамамларға һүҙ ҡуйыштылар.

— Бөтә сәсеүлек майҙанынан уртаса 14 центнер урожай үҫтереп алырға!

Киндер үҫтереүсе мастерҙар сер бирергә теләмәнеләр. Улар, тауышһыҙ ғына кәңәшләшеп алғандан һуң, ун бер гектарҙан 88 центнер орлоҡ, 220 центнер сүс алырға вәғәҙә бирҙеләр.

Был — Указда күрһәтелгән норманан да артығыраҡ. Аҙаҡҡы һүҙҙе 81 йәшлек Нуретдин бабай алды.

— Мин уҙған йыл аҙыраҡ мазаһыҙланып сыҡтым. Әллә ҡартлыҡ баҫа, әллә таҙалыҡ ҡаҡшай. Быйыл үҙемдә ярайһы һиҙәм. Шуға күрә үҙем һымаҡ ҡарттарҙы һәм комсомол Ғимаев Фатих звеноһын яҙғы эш ваҡытында норманы көн һайын бер ярымға үтәргә ярышҡа саҡырам. Өҫтәп шуны ла әйтәм, ике үгеҙем менән яҙ көнө генә 12 гектар ер һөрәсәкмен. Бөттө.

Былай ҙа тулҡынланып торған ихтыярлы йөҙлө, ҡыҫҡа, ҡара мыйыҡлы Биктимер уның һүҙҙәренән йәшәреп, ҡанатланып китте. Ул бер аяҡлылығын онотто, тиҙҙән илле йәше туласағын да һиҙмәй, егеттәрсә атлап, бабай янына килде һәм уның елкәһенән һөйҙө.

— Рәхмәт, Нуретдин бабай, рәхмәт. Эшһеҙ ятһаң, бик тиҙ бөгөлөрһөң. Мин шулай уйлайым, башҡалар ҙа шулай уйлайҙыр кеүек тойола.

Аттар эре-эре атлап, һабан-тырмаларын шылтыратып ауылға табан ҡуҙғалдылар.

Биктимер агротехник Шакиров Хәйҙәрҙе эйәртеп, тағы менән разведка яһап баҫыуҙарҙы ҡарарға китте.

Бына киндер баҫыуы. Барлығы 23 гектар. Яртыһына картуф, яртыһына киндер сәселә. Алдағы йылды киреһенсә эшләнә. Көҙөн һөрөлмәй, сөнки яҙ был ерҙе һыу баҫа. Һыу кипкәс, ике тапҡыр арҡылыға, буйға һөрөлә, тырматыла. Ҡыш бында мин йөк сереган тиреҫ түгелде. Быйыл өс звено үҙ-ара ярышасаҡ. Бына бойҙай, һоло сәселәсәк баҫыу 251 гектар. Бөтәһе лә көҙ һөрөлгән. Түгелгән тиреҫтән баҫыу сып-сыбар. Йөҙ гектар ужым аҙыҡландырыласаҡ.

Бына үткән йыл ғына ултыртылған алма ағастары — 123 төп.

— Һин нисек уйлайһың, Хәйҙәр энем, былар бик аҙ түгелме?

— Нәмә тураһында һөйләйһең?

— Һуң нәмә, иген дә иген. Арыш—бойҙай, күп булғанда кишер, сөгөлдөр. 18 йыл колхозда йәшәп ни бары уҙған йыл алмағастар ултыртыуға башыбыҙ етте. Беҙҙә биш—ун гектарлы емеш-йәшелсә баҡсаһы булырға тейеш. Ҡойроҡҡа Ыҡ йылғаһы аға. Унан ни файҙа? Барлы-юҡлы бер тирмәнде әйләндерә. Ә ун электростанция ҡорһаҡ, тағы ярыҫҡа, молотилкаларға аттарҙы түгел, һыуҙы егергә кәрәк. Ә йәшелсә баҡсаларына. У... күпме һыу, ер, кәс «мүкләнеп» ята. Йәшәй белмәйбеҙ, белһәк тә әллә нисегерәк, бер яҡ менән. Әгәр көн һайын йәшелсәле аш бешерһәк, сәй янына бал, алма килтерелһә, насармы? Колхоз байыһа, ил дә байый. Дөрөҫмө? Әлбиттә! Нәмә ул бөтә колхозға 37 баш умарта. Ә ниңә 137 баш түгел? Фермала 161 тауыҡ ҡытаҡлап йөрөй. Беҙҙең мең баш тауыҡ аҫрарлыҡ көсөбөҙ бар. Колхоздың һәр һыйыры, ферманың бөтә малы эре, күп һөтлө, итле булһа насармы? Ә ниңә анау Ыҡ аръяғындағы Чәкән ауылында шулай. Мин бик күп, ҙур нәмәләр планлаштырып йөрөйөм әле. Уларҙың бөтәһе лә быйыл хәл ителәсәк. Һис һүҙһеҙ, беренсе планда—иген.

Колхозсыларҙың бөтә һүҙҙәре Указға бағышланған. Сөләймәнов өндәшмәй генә улар һүҙенә ҡолаҡ һала.

— Эш орденда түгел, ә еңеүҙә.

— Эйе шул. Бай урожай, бай тормош, бай ил, орденлар да ҙурыраҡ.

— Быйыл Фрунзе колхозы үҙенең кемлеген күрһәтәсәк!

— Бөтә хикмәт ярышып эшләүҙә. Сәмләнеп түгел, ә дуҫтарса ярышып эшләргә кәрәк.

— Эйе шул, бына «Игенсе» колхозына киндерҙән юғары урожай алыу тураһында һөйләргә кәрәк. Биктимер ағайға әйтергә кәрәк.

— Үҙе лә килә түгелме.

— Һөйләшегеҙ, серләшегеҙ, ҡыҙҙар, минән тартынмағыҙ, мин һеҙҙән бик күп нәмәләргә өйрәнәм. Шунһыҙ йәшәп булмай.

Фрунзе исемендәге колхоз Указға яуап итеп бай емешле, һөҙөмтәле һөжүмгә бара. Тиҙҙән ул һөжүм тоҡанып китәсәк.

И. Абдуллин.
Фрунзе исемендәге колхоз,
Шаран районы.

Электроборудованиеләре заводының слесаре иптәш А. З. Гончаров дүрт йылда 15 йыллыҡ норма үтәүгә йөкләмә алғайны. Ул йөкләмәһен намыҫ менән үтәп, инде 1952 йыл иҫәбенә эшләй.
Һүрәттә: иптәш Гончаров үҙенең автоматы янында.
В. Жданов фотоһы.

Мәктәптәрҙә музыка-йыр уҡытыу

ВКП(б) Үҙәк Комитетының В. Мураделиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһы тураһындағы ҡарары музыка өлкәһендәге етешһеҙлектәрҙе, уларҙың сәбәптәрен бик асыҡ күрһәтте. Был тарихи ҡарар нигеҙендә беҙгә, мәғариф эшселәренә, мәктәптәрҙә йыр-музыка уҡытыуҙарының торошон ҡабаттан ҡарап сығырға, ул эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк.

Программа буйынса башланғыс мәктәптәрҙә тәҡдим ителгән күп кенә йыр репертуары үҙләштерелмәй ҡала. Ул йырҙарҙың тексы юҡ, уҡытыусыларҙың күбеһе уларҙың йөкмәткеһен белмәйҙәр. Шул арҡала, йыш ҡына, осраҡлы, балаларҙың йәшенә тура килмәгән йырҙарҙы файҙаланалар. Ҡала мәктәптәрендәге балалар был бушлыҡты йыш ҡына үҙҙәре, күбеһенсә урамдан килгән, яраҡһыҙ «йырҙар» менән тултыралар. Ә ауыл мәктәптәрендә эш тағы ла насарыраҡ тора.

Быны программа буйынса башҡорт башланғыс мәктәптәренең икенсе класына тәҡдим ителгән көйҙәр: «Выйду ль я на реченьку», «В сыром бору тропинка», «Маки маковочки», «Ивушка», «Калина», «Перевейся хмелем», «Дуня тонкопряха», былардан тыш, бер нисә украин, белорус, поляк көйҙәре бирелгән.

— Был көйҙәрҙән береһен дә өйрәтмәйем, — ти Ҡыйғы районының ике комплектлы Маҫаҡ мәктәбенең уҡытыусыһы Котова, — уларҙың йөкмәткеһен белмәйем. Хатта йөкмәткеләрен белгәндә, өйрәтә алмаҫ инем, сөнки уларҙың ноталары юҡ.

Бындай хәл бер Маҫаҡ мәктәбендә генә түгел, күп мәктәптәрҙә осрай. Маҫаҡтың педучилищеһын бөтөрөүселәре мәктәптәрҙә ноталар юҡлығын зарланалар. Уларға, шул сәбәпле, 1937 йылда сыҡҡан йырҙар йыйынтығынан файҙаланырға тура килә. Билдәле, ул йыйынтыҡҡа хәҙерге программала күрһәтелгән күп йырҙар инмәгән.

Башланғыс мәктәптәрҙә йыр дәрестәрен беренсе класс менән өсөнсө класс уҡыусыларын бергә ҡушып үткәрәләр ҙә ҙур уңайһыҙлыҡ тыуҙыралар. Уҡытыу методикаһы буйынса бындай ҡатнаш уҡытыу дөрөҫ тип һаналырға тейеш түгел. Ә күп кенә мәктәп уҡытыусылары ошо элементар хәлде аңлап еткермәйҙәр. Берҙән, улай уҡытыу ете йәшлек балалар өсөн ҡыйын була, икенсенән, ун йәшлек балалар өсөн ҡыҙыҡһыҙ. Шулай уҡ, программа буйынса, ул класстарҙың репертуарҙары ла ярашмайҙар.

Музыка-йыр уҡытыусылары күп етешмәйҙәр, йыш ҡына уҡытыусылар был эште үҙҙәренә лә ҡайһы бер ҡала. Педучилищеларҙа буласаҡ уҡытыусыларҙы тәрбиәләү, уларҙың музыкаль культураһын күтәреү эштәре насар ҡуйылған.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарарында йыр иждады музыкаль культураны үҫтереүҙә иң төп элементе итеп күрһәтелә. Ул беҙҙең композиторҙарыбыҙҙың береһе лә мәктәптәр өсөн йыр яҙғаны, йыр уҡытыусылыҡтың торошо менән ҡыҙыҡһынғаны юҡ. Ә мәктәптәрҙә 200 мең бала уҡый.

Балалар өсөн булған музыкаль репертуарҙы тотош ҡабаттан ҡарап сығырға, йыр һәм музыкаль әҫәрҙәр йыйынтығы баҫтырып сығарырға кәрәк. Шул саҡта беҙ мәктәптәрҙә музыкаль тәрбиә эшен юғары күтәрә алырбыҙ, совет йәштәрен художестволы ҡаршы, яраҡһыҙ йырҙарҙың йоғонтоһона бирелеүҙән ныҡ яҡлап алырбыҙ. Беҙҙең йәштәргә классик йыр мәктәбенең иң ҙур ҡаҙаныштарын, совет композиторҙарының һәм халыҡ араһында ныҡ таралған йырҙарҙы тәрбиәләргә бөтә иғтибарҙы бирергә кәрәк.

В. П. Песков.

Йәштәрҙең дөйөм торлағында

Өфө тимер юл депоһының эшсе-йәштәре торлағында тәрбиәселәр культуралы тормош менән йәшәйҙәр. Торлаҡ йорто яңы ғына [illegible].

Йәштәр араһында тәрбиә эштәрен Мария Дроздова иптәш алып бара. Ул һәр айға конкрет план төҙөй һәм уны эҙмә-эҙ тормошҡа ашыра. Иптәш Дроздованың етәкселегендә бында культура, тормош, санитар советтары һәм художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәге эшләп килә. Ошо көндәрҙә йәштәр өсөн хеҙмәт дисциплинаһы темаһына лекция һәм доклад уҡылды. Лектор итеп прокурор Бутлов иптәштең докладын булды, стена газетаһы редколлегияһының отчеты тыңланды, депоның стахановсыһы Соколов иптәш менән осрашыу үткәрелде.

Дөйөм торлаҡ бүлмәләре араһында социалистик ярыш ойошторолған. Бүлмәләрҙе таҙа тотоу, культуралы йәшәү — ярыш договорҙарының төп пункты итеп алынды. Староставары Плотникова, Дроздова иптәштәр булған 16 һәм 18-се бүлмәләр ярышта алдынғы урынды алып баралар. [illegible]

Р. Истамгулов.

Башҡортостанда киммәтле һыу йәнлектәрен үстереү эше

Башҡортостандың һунарсылары киммәтле һыу йәнлектәре — ондатра, выхухоль, америка норкалары үрсетеүгә ҙур эш алып баралар. Үткән йылда Шишмә һәм Бәрә районындағы күлдәргә 305 ондатра һәм 537 выхухоль, а Мәҡәр районындағы Ерген һәм Һалауек йылғаларына 120 америка норкалары ебәрелгәйне. Бер йыл эсендә уларҙың үрсеүе ике тапҡырға артты.

Ошо көндәрҙә һунарсылар 300 выхухолде тотоп, тиреләрен тапшырҙылар.

А. Сухов.

Баҫыусылыҡ бригадалары телефонлаштырыла

Ҡандра район связь бүлеге яҙғы сәсеү осорона колхоз правленияларынан оператив етәкселекте көсәйтеү маҡсатында баҫыусылыҡ бригадаларына һәм стандарына телефон линияһы үткәрә.

Бөтәһе ете колхозда коммутатор ҡуйылып, 37 баҫыу станына телефон аппараттары урынлаштырылды. Был, баҫыусылыҡ бригадаһын хеҙмәтләндерәсәк.

Быйыл башҡа связь бүлеге Сәрдек-Туктағол араһында телефон линияһы үткәреп — районды бөтә ауыл Советтарын телефонлаштырҙы.

Хәҙер «Өс йәйнең», «Ҡыҙыл Өсөн», «Яңы тормош» колхоздарының баҫыусылыҡ бригадалары телефонлаштырылды ла инде.

Байрам алды сауҙаһы

Башҡорт АССР-ы сауҙа эштәре Министрлығы байрам алды көндәрендә ҡала хеҙмәтсәндәренең талаптарын тулым итеү маҡсатында сауҙа эштәрен киңәйтеү буйынса байтаҡ саралар күрә.

Ҡаланың бөтә магазиндары, ларектәре 28 апрелдән башлап һәр көн эшсе көн йәйелдерә. Уларҙың эш ваҡыттары төнгө 12 һәм 1 сәғәткә тиклем дауам иттереләсәк.

1 һәм 2 май көндәрендә азыҡ-түлек магазиндары, ларектәр тауар ассортименттарын киңәйтеүҙә бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланасаҡтар. Байрам көндәрендә һатыла торған продукттарҙың сифаттарына ла ныҡ әһәмиәт бирелә.

Байрам көндәрендә демонстрация ваҡытында, шулай уҡ кинотеатрҙар янында һәм башҡа шундай халыҡ күп булған урындарҙа һатыу итеү өсөн буфеттарҙан башҡа 338 күсмә ларек ойоштороласаҡ. Был ларектәрҙә кондитер изделиелары һатыласаҡ.

Республиканың коммуналь хужалығы эштәре

Республикабыҙҙың коммуналь хужалығы быйыл капиталь төҙөлөштәр өсөн, 1947 йылға ҡарағанда, ике тапҡыр артыҡ средство бүлергә. Ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә 1948 йылда торлаҡ һәм коммуналь төҙөлөш эштәре киң колас алырға тейеш.

1948 йылда Бәрә районында механизациялаштырылған ҙур водопровод төҙөлергә тейеш. Быйыл шулай уҡ Стәрлетамаҡ ҡалаһының да водопровод төҙөү тамамланасаҡ. Стәрлетамаҡ һәм Өфө ҡалаларында мунсалар, Дәүләкәндә дизель электр станцияһы төҙөү планлаштырыла. Белорет һәм Благовещен ҡалаларындағы электр станциялары реконструкциялана.

Хәҙер Өфө, Черниковск, Белорет, Стәрлетамаҡ ҡалаларындағы күп предприятиелар был сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн эшкә башланылар.

Колхоз кадрҙары

БАЙМАҠ. Район ауыл хужалығы бүлеге быйыл ҡыҫҡа сроклы курстар аша агротехниктар, ветфельдшерҙар, ветсанитарҙар, счетоводтар—бөтәһе 120 ауыл хужалығы белгестәре әҙерләп сығарҙы, 15 колхозсыны ике ауыл хужалығы мәктәбенә ебәрҙе.

Районда 37 колхозда агротехник һәм ветсанитар уҡыу түгәрәге эшләй. Уларға уҡыусыларҙың 15 агроном, 16 зоотехниктар етәкселек итә.

Яңы гидростанция

Нарат аҫты ауылынан бер нисә километрҙа ситтә, Сеп йылғаһында быйыл электр станция һалынасаҡ. Был станция «Ҡыҙыл юл», «Тархан», «Марс» һәм «Шишмә» колхоздарын электр энергияһы менән тәьмин итәсәк.

Берекәс күбәйтә молотилкалар, тирмәндәр, таҡта ярыстар электр көсөнә күсәсәк. Фермалар, клуб һәм колхозсыларҙың йорттары Ильич лампалары менән яҡтыртылыр.

Был Шаран районында йыйыу кеүек менән эшләй торған тәүге һәм ҙур станция буласаҡ.

Почта аша китап ебәреү

Когизлең Өфө магазинында «почта аша китап ебәреү» бүлеге ойошторолдо. Был бүлек халыҡтың һәм ойошмаларҙың айырым китаптарҙы ебәреү тураһында булған һорауҙарын үтәй. Бүлек рус телендә политик, техник һәм ауыл хужалығы әҙәбиәтенә бай. Башҡорт һәм татар телдәрендә сыҡҡан китаптарҙың бөтә төрөн дә һоралған урынларға ебәрә.

Донъя шахмат чемпионаты

Донъя беренселегенә шахмат матч-турниренең 22 апрелдә 16-сы туры уйналды. Был турҙа Решевский—Смыслов, Керес—Эйве осраштылар.

Керес — Эйве партияһы 33 йөрөштән һуң, Керестең отошо менән, Решевский — Смыслов партияһы бер яҡтың да отмауы менән бөттө.

16 турҙан һуң матч-турнирҙә ҡатнашыусыларҙың хәле түбәндәгесә: Ботвинниктең уп берҙән — 8 очкоһы һәм бер кисектерелгән уйыны, Керестең ун икенән — 7,5 очкоһы, бер кисектерелгән уйыны бар. Решевскийҙең ун өстән — 6,5, Смысловтың — 6, Эйвенең — 3 очкоһы бар.

23 апрелдә Керес менән Ботвинниктең кисектерелгән партияһы уйнала. Шәмбе көн, 24 апрель, ял көнө. (ТАСС).

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Италияла һайлауҙарға ҡарата

РИМ, 22 апрель. (ТАСС). Анса агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, депутаттар палатаһында христиан-демократик партия 574 мандаттың 307-һен, халыҡ демократик фронты — 182 мандат алған.

Сенатта христиан-демократик партия 148 урын, халыҡ демократик фронты — 119 урын алған.

„Унита“ газетаһына Тольяттиҙең интервьюһе

РИМ, 22 апрель. (ТАСС). Тольятти «Унита» газетаһының хәбәрсеһенә яһаған интервьюһендә, һайлауҙар һөҙөмтәләре тураһында фекеренең нисек икәнлеге тураһындағы һорауға былай тип яуап бирҙе:

Һөҙөмтәләр тураһында әйткәндә тиклем мин һайлауҙарҙың үҙҙәре тураһында һәм кампанияның иң баштан алып тауыш биреүгә тиклем нисек әҙерләнгәнлеге һәм үткәнлеге тураһында һөйләүҙе кәрәк, тип һанайым. Мин, һайлауҙар 18 апрелдә Италия халҡының үҙ иркен иркле рәүештә күрһәтеүҙәре булып торманы, тип раҫлайым һәм минең был раҫлауымды бер кем дә кире ҡаға алмаҫ, тип уйлайым. Һайлауҙар иркле булманы. Өс элемент — мәжбүр итеү, алдау һәм ялтаҡлау һайлаусылар массаһының политик ирклелеген сикләнеләр һәм юҡҡа сығарҙылар. Барыһын элек, һайлаусыларҙың ихтыярына баҫым яһау маҡсатында, сит илдең тупаҫ рәүештә тығылыуы булды. Был ниндәй ҙә булһа хәҙерге заман иленең тарихендә әлегә тиклем булғаны юҡ инә әле. Был ҡыҫылыу — әгәр ҙә беҙҙең илебеҙ халыҡ демократияһы фронты өсөн тауыш бирһә, уны асығырға мәжбүр итеү менән, һуғыш менән һәм хатта, әгәр ҙә айырым ҡалаларҙа һәм өлкәләрҙә тауыштарҙың күпселеге халыҡ-демократик фронты өсөн бирелһә, мөмкин булмаған ҡурҡытыу — атом бомбаһы ташлау менән ҡурҡытыуҙа күҙәлэнде. Икенсенән, һайлаусыларҙың ихтыярына баҫым яһау һәм уны боҙоп күрһәтеү маҡсатында священниктарҙың һәм бөтә сиркәү ойошмаһының һайлауҙарға законһыҙ рәүештә тығылыуы күренде, был беҙҙең конституциябыҙҙы һәм һайлау законын асыҡтан-асыҡ боҙоу булып тора, сөнки енәйәт итеп күрһәтелгән һәм бындай, эштәр өсөн закон буйынса яза бирелә торған акттар эшләнде.

Өсөнсөнән, хөкүмәт тарафынан халыҡты һәм предпринимателдәр тарафынан хеҙмәтсәндәрҙе ҡурҡытыуҙары һәм уларға баҫым яһауҙары киң масштабтар алды.

Реакцион көстәрҙе христиан-демократик партия тирәһенә берләштереү һәм сит ил кешеләре, сиркәү һәм капиталистар тарафынан был партияға бирелгән материаль средстволар уға оятһыҙ рәүештә һәм әлегә тиклем ишетелмәгән масштабтарҙа тауыштар һатып алыуға мөмкинлек бирҙеләр.

Д. Гаспери тарафынан күрһәтелгән: «Нисек кенә булһа ла», тигән лозунг ғәмәлдә, христиан-демократик партияның һәм христиан-демократик партия хөкүмәтенең сеҙүгә өлгәшеү маҡсатында демократия ҡағиҙәһен, мораль ҡағиҙәһен һәм хатта ябай намыҫлылыҡ ҡағиҙәһен таптап эш иткәнлектәрен аңлатты. Быларҙың бөтәһенән сығып, һайлауҙар демократик һайлауҙар ҙа, иркле һайлауҙар ҙа булманылар, һәм был Италия халҡына һәм бөтә донъя халҡына еткерелергә тейеш, тигән һөҙөмтә яһарға кәрәк. Ул саҡта, быларҙың бөтәһенә ҡарамаҫтан, 8 миллион Италия гражданының халыҡ демократик фронты тирәһенә берләшкәнлеге фактыһының демократия өсөн ниндәй ҙур әһәмиәтле булғанлығы яҡшыраҡ аңлашылыр. Был ҙур көс. Был көс менән реакцияға ҡаршы көрәшергә тура киләсәк. Италияның көнъяғының халыҡ демократик фронтына хәл иткес ярҙам күрһәтеүе айырыуса әһәмиәтле булып тора.

Һайлау ирклелеген асыҡтан-асыҡ боҙоуға ҡарата Тольяттиҙең раҫлауҙары уның 18 апрелдәге һайлау һөҙөмтәләре менән риза булмағанлығын күрһәтәләрме, тигән һорауға яуап биреп, Тольятти түбәндәгеләрҙе әйтте:

Әгәр ҙә «риза түгел» тигән һүҙҙәр, көслөк методтарын ойоштороусыларҙы һәм халыҡҡа ҡаршы интригаларҙы хөкүмәттән ҡыуыу өсөн көс ҡулланыласаҡ, тигән мәғәнәлә аңланырға тейеш булһалар, ул саҡта беҙ беҙҙең бер ниндәй ҙә уйҙарыбыҙ юҡ тип әйттек инде һәм шуны ҡабатлайбыҙ. Көскә мөрәжәғәт итеү, асыҡ көрәштең һөҙөмтәһе ниндәй генә булһа ла, беҙҙең илебеҙгә һис шикһеҙ, зыян килтерер ине, ул үҙенең бөтә бойондороҡһоҙлоғон юғалтыр һәм тамам тарҡалған ил булып әүерелер ине. Был демократия эшенә лә шундай уҡ зыян килтерер ине. Ләкин беҙ Италияның демократик общественный фекере алдында һәм бөтә донъя алдында, ошо һайлауҙарҙа Италия халҡының азатлығын һәм ихтыярын боҙоуҙы фаш итәбеҙ. Беҙ иркле һайлауҙар тураһында мәсьәлә ҡуябыҙ. Был һайлауҙар ваҡытында халыҡ вәкилдәре, сит ил кешеләре халыҡты аслыҡ һәм һуғыш менән, ә священниктар — тамуҡ менән ҡурҡытмаған шартта һайланһындар. Италиялағы азат кешеләр беҙҙе аңларҙар һәм беҙҙең артыбыҙҙан эйәрерҙәр. Беҙҙең көрәшебеҙ демократия өсөн, халыҡтарҙың азатлыҡтарын хөрмәт итеү өсөн, беҙҙең халҡыбыҙҙың суверенитетын һәм достоинстволарын аяҡҡа баҫтырыу өсөн көрәш булып тора һәм артабан да шундай көрәш булып ҡаласаҡ.

Халыҡтың һайлау иркен политик яҡтан боҙоу нисек килеп тыуҙы, тигән һорауға Тольятти түбәндәгесә яуап бирҙе:

Бик күп һандағы процент ташкил иткән һәм, һис шикһеҙ, политик яҡтан актив булған халыҡтың күпселеге булып тороусы һайлаусылар һәр төрлө баҫымға, ҡурҡытыуға һәм һатып алырға маташыуҙарға ныҡлы рәүештә ҡаршы торҙолар һәм халыҡ демократик фронты тирәһенә тупландылар. Аумаҡай һәм политик яҡтан актив булмаған масса, киреһенсә, үҙенең күпселегендә көслөк, ҡурҡытыуҙар һәм баҫым яһауҙар йоғонтоһона бирелде. Былар уны үҙенең тауыштарын хакимлек итеүсе реакция партияларына бирергә мәжбүр иттеләр һәм был партиялар, шулай итеп, тауыштарҙың күпселеген йыя алдылар. Был илдә бик серьез политик хәлле һәм актив халыҡтың демократик күпселеге менән хөкүмәт араһында — власе сит ил тығылыуына, тамуҡ менән ҡурҡытыуҙарға, яһауҙарға һәм һатып алыуҙарға нигеҙләнгән хөкүмәт менән мөнәсәбәттәрҙең ҙур киҫкенләшеүен килтереп тыуҙыра. Беҙ был халдең нисек үҫәсәген киләсәктә күрербеҙ.

Партияның позициялары тураһында әйтергә мөмкинме, тигән һорауға яуап биреп, Тольятти түбәндәгеләрҙе билдәләне: был ӓһәмиәттән өс факт характерле булып тора. Беренсенән, Италия халҡының демократия, суверенитет һәм достоинстволылығы эше бары тик халыҡ демократик фронты партияларына ғына ышанып тапшырылған.

Икенсенән, христиан-демократик партияһының халыҡ-ара һәм милли капитализм араһындағы бөтә реакцион группаларҙың вәкиле булып әүерелгәнлеге ап-асыҡ күренеп тора. Был капитализм исеменән ул ил менән идара итергә ынтыла.

Иң һуңынан, бер ни тиклем тауыштар йыйнап, традицион социал-демократияның, йәғни «социализм» исеменән һөйләп, социализм һәм демократия интерестарына хыянат итеүсе һәм обществоның иң ҡара реакцион көстәре менән тыңсыл рәүештә хеҙмәт итеүсе партияның килеп тыуыуы факты ла әһәмиәтле булып тора. Шулай ҙа был әфәнделәрҙең сағыштырмаса уңышҡа өлгәшеүҙәре сит ил тығылыуынан һәм дин террорҙан башҡа мөмкин булмаҫ ине. Улар, христиан-демократик партия файҙаһына нисек хеҙмәт иткән булһалар, был әфәнделәр файҙаһына ла шундай уҡ дәрәжәлә хәрәкәт иттеләр. Либераль партиянан алып кувлюнкуистик партияға тиклем булған башҡа партиялар ниндәй ҙә булһа серьез политик әһәмиәттән мәхрүм ителеп статистар роленә тиклем илтеп еткерелделәр.

Коммунистар партияһының позицияһы ниндәй, тигән һорауға, Тольятти түбәндәгесә яуап бирҙе: хәҙерге халдең, ихтимал, иң рухландырыусы һәм иң әһәмиәтле элементе шунан тора. Мин әле тиклем әйтеп үткәнемсә, беҙҙең көстәребеҙ уларға төрлө яҡтан яһалған ҡыҫымды кире ҡаҡтылар һәм шуның менән бергә, көтелгәнгә ҡарағанда ла күберәк батырлыҡ һәм энергия күрһәттеләр. Был көстәр бөтә урында ла халыҡ араһында үҙҙәре яҡлы яңы кешеләрҙе яулап алып ҡәтғи рәүештә һөжүмгә күсә барҙылар. Беҙ бөтә көстәребеҙ менән халыҡ демократик фронтына ярҙам иттек. Уның уңышы беҙҙән бәйле булған бөтә урында был уңыш тәьмин ителде, сөнки коммунистар демократия эшен һәм халыҡ берҙәмлеге эшен бөтәһенән дә өҫтөнөрәк итеп ҡуйып, ҙур ышаныс менән һәм тайпылышһыҙ рәүештә көрәштеләр. Дошман беҙҙең бер генә позициябыҙҙан да беҙҙе мәхрүм итә алманы. Италиянан коммунизмде ҡыуырға мөмкин тип һәм хәҙер ҙә уйлай торған кешеләр шуны белһендәр: коммунизм 18 апрелдән һуң элеккегә ҡарағанда ла көслөрәк булып тора. Беҙҙең партиябыҙ һәм бигерәк тә көньякта көрәштә тағы ла һәләтлерәк, тағы ла ойошҡаныраҡ булып сыҡты, ул бөтә социаль ҡатламдарҙа һәм барыһынан элек, хеҙмәтсәндәр араһында үҙе яҡлы булған яңы кешеләрҙе яулап алды.

Бизонияла немец армияһын төҙөүгә ҡарата Америка пландары

БЕРЛИН, 22 апрель. (ТАСС). Берлиндең «Националь цейтунг» газетаһы үҙенең Брюсселдәге хәбәрсеһенән түбәндәге белдереүен иғлан итте:

Вашингтондан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Америка армияһының генеральный штабы янында бынан өс ай самаһы элек йәшерен бүлек төҙәлде. Был бүлектә элекке Германия генеральный штабының 27 офицеры эшләй. Был фактының ныҡ йәшерен итеп тотолоуына ҡарамаҫтан, был офицерҙарҙың Көнбайыш Германия өсөн немец армияһын төҙөү пландарын эшләүҙәре тураһында мәғлүмәттәр алынды. Кәрәкле ҡоралдарға сметалар төҙөлгән, офицерҙар кадрҙары тураһында мәғлүмәттәр әҙерләнгән да инде һәм хәрби-оператив пландар өҫтөндә эш үткәрелә. Бынан тыш, Көнбайыш Германия промышленносын бүләсәк һуғыш маҡсаттарында файҙаланыу буйынса әҙерлек саралары үткәрелә. Праганың «Оборона зиху» газетаһының күптән түгел хәбәр итеүенә ҡарағанда, Американың Германиялағы ғәскәрҙәре штабы эргәһендә лә шундай уҡ бүлек төҙөлгән. Германия генеральный штабының элекке генералдары һәм офицерҙары, шул иҫәптән, Гальдер, Рундштедт, Кессельринг һәм Гудериан консультанттар сифатында ошо бүлек эшенә ылыҡтырылғандар.

Шунан ары, «Националь цейтунг» ошо уҡ номерында Көнбайыш Германияла хәрби-һауа көстәрен төҙөү буйынса Америка тарафынан үткәрелә торған саралар тураһында Телепресс агентлығының информацияһын урынлаштыра. Киләсәк яңы авиация командующее сифатында Испаниялағы һуғыш буйынса билдәле булған гитлерсе «Легион Кондор» ҙың командиры генерал Вальтер Вармюнттың исемен әйтәләр. Был генерал күптән бирле инде элекке немец—хәрби-һауа көстәре летчиктарының һәм специалистарының исемлектәрен төҙөү менән шөғөлләнә һәм хәҙер «Кондор легионы ветерандары союзын» ойоштора башлаған.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — Кисдөҙ — «ЕТЕ ЮЛ САТЛЫҒЫНДА». 12 сәғәттә башлана.

Кис: «ЦИТАДЕЛДӘГЕ ТОРМОШ». 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Башгосфилармонияла — Сәхнәлә цирк, ҙур физкультура аттракционы фокустар күрһәтеү, музыкаль эксцентриктар һәм башҡалар. Киске 9 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — СЕБЕР ЕРЕ ТУРАҺЫНДА ХИКӘЙӘТ».

«Салауатта» — ЦАРИЦЫНДЫ ОБОРОНАЛАУ».

Матросов исемендәге кинола «БЕРЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫҺЫ».

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-18, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

Л 00722. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х. — 1. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 84 27 апрель шишәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘА:

Беҙҙең республикала. (1-се бит).
Ғ. Әхмәтшин. — Баҫыуҙа эш шулай башланды. (1-се бит).
Алдынғыларға наградалар тапшырылды. (1-се бит).
Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (2—3—4-се биттәр).
Х. Маннанов. — Нефтселәрҙең яңы коллектив договоры. (4-се бит).
Атлантик-Ситиҙа Уоллестең сығышы. (4-се бит).

Яҙғы сәсеүҙә массовый-политик эштең бурыстары

Республикабыҙҙа яҙғы сәсеү эштәре башланды. Колхозсылар, МТС һәм совхоз эшселәре ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын тулыһынса тормошҡа ашырыу эшендә мөһим этап булған яҙғы сәсеүҙе большевистик темп менән, ҡыҫҡа срокта өлгәлә итеп үткәреү өсөн көрәшкә сыҡтылар. Баҫыу эшсәндәре, ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, уларҙы ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указдары һәм алдынғыларҙың гүзәл өлгөләре менән рухланып, ғәйәт ҙур политик күтәренкелек менән эшләп, быйылғы йылғы яҙғы сәсеүҙә тағы ла юғарыраҡ урожай алыуҙың нығыклы нигеҙен һаласаҡтар.

Быйыл республикабыҙҙың игенселәре алдында тағы ла ҙурыраҡ бурыстар тора. Бөтә культураларҙың сәсеү майҙаны, үткән йылға ҡарағанда, 23,2 процентҡа, ә яҙғы бойҙайҙың сәсеү майҙаны икеләтә артырға тейеш. Бөртөклө культураларҙың урожайын һуғышҡа тиклемге кимәлдән байтаҡ арттырыу планлаштырылған.

Был бурыстарҙы үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Хөкүмәтебеҙ колхоздарға етерлек һанда орлоҡ бирҙе, ауыл хужалығы машиналары менән тәьмин итте, ә МТС һәм совхоздар күп һанда ҡеүәтле тракторҙар алдылар. Большевиктар партияһының һәм тыуған Совет Хөкүмәтебеҙҙең ҙур хәстәрлегенә республикабыҙҙың эшсәндәре ауыл хужалығын артабан күтәреүҙә данлы хеҙмәт менән яуап бирәләр.

Яҙғы сәсеү кампанияһының бурыстары ҙур. Бөтә колхозсыларҙы, МТС һәм совхоз эшселәрен яҙғы сәсеү эшенә мобилизовать иткән хәлдә генә алда торған был бурыстарҙы уңышлы итеп, тулыһынса үтәргә мөмкин. Хәҙер бөтә район, колхоз, совхоз һәм МТС партия ойошмаларының бурысы хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эште артабан көсәйтеү, социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдереү юлы менән ауыл эшсәндәрен фиҙакәр эшкә рухландырыуҙан тора.

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн эштә ҙур ойошҡанлыҡ, бөтә көстө һәм мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланыу, эш темпын максималь ҡыҙыулаңдырыу талап ителәсәк. Сәсеү ваҡытында хеҙ- [illegible]

[illegible]

нең практик эше менән башҡаларға өлгө күрһәтеүсе — большевистик ойоштороусы булырға тейеш.

Салауат районы Гузаков исемендәге колхоздың тәүге партия ойошмаһы яҙғы сәсеү осоронда политик-массовый эштең планын төҙөнө. Коммунистар баҫыу эштәренең хәл иткес участкаларына беркетелделәр. Коммунист бригадирҙар Гусев һәм Серов иптәштәр үҙ бригадаларында агитация эшен алып барасаҡтар. Улар хәҙер үк стена газетаһы, «боевой листоктар» сығара башланылар. Газета витриналары ойошторҙолар. Коммунистарҙан Доколов һәм Ермаков иптәштәр сәсеүселәр һәм һөрөүселәр араһында агитатор булып эшләйәсәктәр.

Массовый-политик эштең идея эстәлегенең юғары булыуына төп иғтибар бирелергә тейеш. Ләкин әле күп райондарҙа политик агитацияның кимәле түбән, политик темаларға доклад һәм беседалар бик аҙ үткәрелә. Ғәҙәттә беседалар колхоздағы, бригадалағы һәм звенолағы практик эштәрҙе аңлатыуға ғына ҡайтып ҡала. Бик күп райондарҙа партия һәм хөкүмәттең ҡарарҙарын, Совет государствоһының эске һәм тышҡы политикаһының төп мәсьәләләрен аңлатыу эше бик йомшаҡ ҡуйылған. Был етешһеҙлектәрҙе киҫкен рәүештә бөтөрөргә кәрәк.

Агитация тәьҫирле, конкрет булғанда ғына үҙенең уңышлы һөҙөмтәләрен бирә. Шуның өсөн агитаторҙың һәр бер беседаһы совет крәҫтиәндәрендә патриотизм тойғоһон нығытһын һәм үҫтерһен, Ватаныбыҙға мөхәббәт, үҙ халҡы, үҙ иле, большевиктар партияһы өсөн ғорурлыҡ тойғоһо тәрбиәләһен, уларҙы Совет государствоһының ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн көрәшкә рухландырһын.

Биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн совет халҡының героик көрәшендә социалистик ярыш иң мөһим эш методы булып әүерелде. Ул хәҙер илебеҙҙә дөйөм халыҡ характерен алды. Ауылда социалистик ярыштың яңы, тағы ла көслөрәк тулҡынын тыуҙырыу, уны массовый һәм һөҙөмтәле итеү — ауыл агитаторҙарының почетлы бурысы. Улар социалистик ярыш методын киң индереүсе, алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәште ойоштороусы булырға тейештәр.

Үткән йыл республикабыҙҙың ауыл хужалығы алдынғылары [illegible]

[illegible]

Пландан тыш

Мәскәүҙәге «Парижская коммуна» аяҡ кейеме фабрикаһы пландан тыш 23 мең пар аяҡ кейеме эшләп сығарҙы — был коллективтең май алды вахтаһындағы тәүге йомғаҡтары шундай. [illegible]

Художник В. Иванов һәм О. Бурова эшләгән плакатты «Искусство» издательство 1 Майға ҡарата баҫып сығарҙы.

ТАСС фотохроникаһы

Кутаиси автомобиль заводы

КУТАИСИ, (ТАСС). Кутаисиҙа төҙөлә торған автомобиль заводында төп склад, ремонт-механик цехы һәм башҡа ентештереү корпустары, ярҙамсы биналар эксплоатацияға тапшырылды. Йыйнау-механик корпусы стеналарының береҫсе наубәте төҙөлдө. Хәҙер бында трансформаторлы ярҙамсы станциялар ҡоролдо. Ремонт-тимерлек цехында ес тонналы сүкешкә нигеҙ һалынды.

Хәрәкәткә ебәреү объекттарында — механик-йыйнау, ҡойоу, ремонт-тимерлек, инструменталь-штамплау цехтары төҙөлөшендә ҙур эштәр бара.

Күптән түгел генә мең квадрат метр торлаҡ майҙаны эксплоатацияға тапшырылды.

Авчал локомотивтар ремонтлау заводы

ТБИЛИСИ, (ТАСС). Закавказье тимер юлында электровоздар, тепловоздар һәм дизель поездар эксплоатацияға индерелә. Уларҙы ремонтлау өсөн Тбилисиҙан алыҫ түгел Авчал районында локомотивтар ремонтлай торған ҡеүәтле завод ҡорола.

Уны төҙөү тамамланыу алдында тора. Йыуыу цехы, локомотивтар комбинаты, машиналарҙы эшкәртеү депоһы корпустары әҙер. Ярҙамсы цехтарҙы төҙөү тамамлана. Илебеҙҙең төрлә ҡалаларынан килгән оборудованиеләр ҡыҙыу темптарҙа монтажлана.

Заводтан алыҫ түгел урында эшселәр поселкаһы барлыҡҡа килде. Өс ҡатлы биш йорт эксплоатацияға тапшырылды. Тағы ла ике торлаҡ бинаһы төҙөлә. Тбилисиҙа завод специалистары өсөн торлаҡ йорт төҙөлдө. Завод управлениеһе, ФЗО мәктәбе, клуб бинаһы төҙөлә башланасаҡ.

Колхозсыларға хеҙмәт көндәре иҫәпләү өсөн таблицалар

Государство ауыл хужалығы әҙәбиәте издательствоһы колхоз бригадирҙарының һәм счетоводтарының хеҙмәтен еңеләйтеү маҡсатында «хеҙмәт көндәрен иҫәпләү таблицаһы» тигән махсус белешмә баҫып сығарҙы. Улар гектарҙар, квадрат йәки кубик метрҙар, тонналар, центнерҙар, килограмдар, литрҙар һәм башҡалар менән үлсәнә торған эштәрҙе иҫәпләү өсөн файҙаланылалар. Брошюраның аҙағында метрик үлсәүҙәр белешмәһе һәм метрик үлсәүҙәрҙе рус үлсәүҙәренә күсереү һәм рус үлсәүҙәрен метрик үлсәүҙәргә күсереү таблицаһы бирелгән.

Брошюра СССР хөкүмәте эргәһендәге колхоз эштәре Советы тарафынан ҡаралды һәм илебеҙҙең ауыл хужалығы артелдәре өсөн ҡиммәтле ҡулланма, тип табылды.

Таблицаны П. П. Сосенков төҙөнө. Белешмә Тимирязев исемендәге ауыл хужалығы академияһы доценты И. М. Прокофьев редакцияһында сығарылды. Тиражы — 200.000 дана.

(ТАСС).

Беҙҙең республикала

Предприятиеләрҙә май алды ярышы

Бишенсе-алтынсы ай пландары иҫәбенә

ЧЕРНИКОВСК. 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһының коллективы байрам алды ярышында алған йөкләмәһен ҡалала беренсе булып срогынан алда үтәне. Биш айлыҡ производство программаһын ес ай ярымда тамамлағандан һуң, коллектив байрамға тиклем алтынсы ай иҫәбенә тағы ла 19 мең йәшник шырпы эшләп сығарыу бурысын ҡуйҙы.

Директоры иптәш Орел булған завод коллективы бишенсе ай планы иҫәбенә ең һыҙғанып эшләй. Бында 19 апрелгә дүрт айлыҡ план үтәлде. Машиналар төҙөү заводында начальнигы иптәш Широков булған цех алда бара. Цех коллективы апрель планын үтәп, байрамға тиклем пландан тыш тағы ла ярты айлыҡ задание күләмендә продукция эшләп сығарыу өсөн көрәшә.

Ҡала предприятиеләренең тиҫтәләрсә стахановсылары май алды ярышы көндәрендә үҙҙәренең биш йыллыҡ нормаларын үтәүҙе тамамлаҡылар. Улар араһында Ямалетдинов һәм Ухов иптәштәр етәкселек иткән заточниктар, слесарь-лекальщиктар бригадалары һәм башҡалар бар.

В. Попов.

Социалистик путевка менән

Өфө депоһы коллективы май алды социалистик ярышына ҡушылып, поездарҙың йөрөшөн тиҙләтеү, яғыулыҡҡа экономия яһау буйынса йөкләмәләр алғайны.

Ярыш йөкләмәләре нигеҙендә, депо машинистары рейс алдынан һәр маршрутҡа яңы конкрет бурыстар билдәләйҙәр. Һәм быңдай составтар социалистик путевка менән йөрөтөлөүсе поездар иҫәпләнәләр.

Депоның атаҡлы машинисы иптәш Кулаков поездарҙы социалистик путевка менән йөрөтөүҙә айырыуса яҡшы өлгөләр күрһәтә. Ул хәҙер техник тиҙлекте һәр сәғәткә 3 километрға арттырҙы һәм ҙур күләмдә яғыулыҡҡа экономия яһай. Машинистар Агрясков, Лысенко һәм Гончаров иптәштәр уның өлгөһөндә эшләп, шулай уҡ юғары күрһәткестәргә өлгәштеләр.

Депола паровозсыларҙың май алды ярышын башлап ебәреүҙә инициатор булған машинист иптәш Уланов үҙенең паровозын 100 мең километр арала ремонтһыҙ йөрөтөргә, техник тиҙлекте сәғәтенә 2,5 километрға арттырырға йөкләмә алғайны. Ул составтарҙы социалистик путевка менән йөрәтеп, йөкләмәһен намыҫ менән үтәй. Хәҙер иптәш Уланов паровозын хужалыҡ иҫәбенә күсерҙе.

Ғ. Рәис.

Запас частәр әҙерләнде

Республикабыҙҙың промышленность предприятиеләре, заводтары МТС-тарҙың, колхоздарҙың ауыл хужалығы машиналарын һәм тракторҙарын запас частәр менән тәьмин итеүҙә ағымдағы йылда ҙур ярҙам күрһәттеләр. Мәҫәлән, ошо йылдың беренсе кварталында директоры иптәш Гуцант булған завод, кабель заводы запас частәр эшләп сығарыу планын 100 процентҡа, ә агрегат һәм резина заводтары 120—190 процентҡа етереп үтәнеләр.

Республика буйынса тик беренсе кварталда ғына тракторҙар өсөн 609 мең һумлыҡ, башҡа ауыл хужалығы машиналары өсөн 138 мең һумлыҡ деталь эшләп сығарылды. Хәҙерге көндә лә был заводтар ауыл хужалығы машиналары һәм тракторҙар өсөн запас частәр әҙерләүҙе дауам иттерәләр.

Государствоға күберәк ит һәм һөт бирәйек

Республикабыҙҙа государствоға ит тапшырыуҙың I квартал планы 157,5 процентҡа, һөт тапшырыу планы 113,3 процентҡа үтәлде. Ярышта I квартал йомғаҡтары буйынса Саҡмағош һәм Бүҙәк райондары алдынғылыҡты алдылар.

Саҡмағош районы ит тапшырыу буйынса квартал планын 256 процентҡа һәм һөт тапшырыу буйынса 200 процентҡа үтәне. Бүҙәк районында ит һәм һөт тапшырыуҙың квартал планы 133,5 процентҡа үтәлде. Шулай уҡ Борай, Ауырғазы һәм Кушнаренко райондары ла йөкләмәләрҙе үтәнеләр.

Алдынғыларға наградалар тапшырылды

25 апрелдә Дәүләкән ҡалаһында ҙур тантана булды. Район культура йортона бөтә колхоздарҙан тиҫерлек ауыл хужалығы алдынғылары йыйналдылар. Уларҙың хеҙмәттәре партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан юғары баһаланды, 5 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, бик күптәр ордендәр һәм медалдәр менән наградландылар. Бына бөгөн юғары наградаларҙы тапшырыу көнө.

БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Ниғмәтжановтың:

— Иптәштәр! СССР Верховный Советы Президиумы исеменән һеҙгә юғары наградалар тапшырырға рөхсәт итегеҙ, — тигән һүҙҙәре бөтә зал тарафынан көслө алҡыштар менән ҡаршылана. «Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ура!» — тигән ҡеүәтле тауыштар яңғырай.

Өҫтәл янына беренсе булып Дәүләкән МТС-ының директоры Федор Максимович Павлов саҡырыла. Уға иң юғары награда — Ленин ордены һәм Социалистик Хеҙмәт Геройының «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медале тапшырыла. Социалистик Хеҙмәт Геройын алдынғылар көслө алҡыштар менән тәбрикләйҙәр. Күп йылдар буйына намыҫлы хеҙмәт өлгөһө күрһәткән, юғары урожай өсөн көрәштә һәр ваҡыт алдынғы сафта барған Дәүләкән МТС-ының өлкән агрономы Дмитрий Леонтьевич Нестеров, өлкән механик Николай Евдокимович Тарасенко, трактор бригадаһы бригадиры Тихон Егорович Алехин, «1-е Мая» колхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Александр Васильевич Стоянов иптәштәр ҙә юғары наградаларҙы — Ленин ордене, «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медалдәрен алалар.

— ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын үтәүҙә, — тине Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Павлов бөтә наградланыусылар исеменән, — беҙҙең район яҡшы уңыштарға өлгәште. Хеҙмәтебеҙ юғары баһаланды. Был наградалар өсөн партиябыҙға, хөкүмәтебеҙгә, һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ысын күңелдән рәхмәт! Беҙ тағы ла яҡшыраҡ эшләргә, юғары урожай өсөн көрәштә яңы еңеүҙәр яулап алырға һүҙ бирәбеҙ.

Ауыл хужалығы алдынғыларынан 22 кешегә Ленин ордены бирелде һәм 200-гә яҡын кешегә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене, шулай уҡ медалдәр тапшырылды.

Баҫыуҙа эш шулай башланды

Ауыл ситендәге бәләкәй генә йылға теке ярҙарына һыйыша алмаҫлыҡ булып ташҡандан һуң, оҙаҡ көтөргә тура килмәне. Апрелдең икенсе аҙнаһында ҡарҙан асылған баҫыуҙарҙы ҡарап ҡайтҡан сифат инспекторҙары правление ултырышында үҙҙәренең фекерҙәрен әйттеләр. Йылға буйы ҡалҡыулығындағы ужымдарға, ҡайһы ғына башынаҡ икеп ҡараһаң да, аяҡ әҙҙәре ҡалырлыҡ түгел. Ер елләй, сәғәте, минуты менән кибеп, ныҡып бара. Ошо ужым өҫтөнә бер йыллыҡ һәм күп йыллыҡ үлән сәсергә әҙерләк алып барылған икән, эште оҙаҡҡа һуҙырға ярамаҫ хәҙер.

Быйыл иҙғы эштәр тап бына шул үлән сәсеүҙән, күп баҫыулы сәсеү әйләнешен индереүҙе тормошҡа ашырыуҙың мөһим шартын үтәүҙән башланырға тейеш ине. 16 апрель кисендә колхоз председателе Семен Теплов баҫыу эштәрен башлап ебәрергә тейешле кешеләр тураһында бригадирҙар менән кәңәшләште. Иртәгеһен сәсеү орлоҡтары тейәгән тәүге йөктәр баҫыу юлына юналделәр.

Тубалдарға ҡатнаштырылған Тимофеевка һәм клевер орлоҡтары тултырылғас, ер башында дуҫтарса бахаҫ булып алды.

— Оло кешенән уҙып булмаҫ инде, әйҙә, Дмитрий Михайлович, үҙең алдан төш, — тине бригадир Федор Теплов, үҙе телә эшкә килгән Медведев ҡартҡа. Дмитрий Михайлович бригадирҙың тәҡдименә ҡушылыуҙы урынлы тапманы:

— Бригадирҙан уҙып булмаҫ инде, — тине ул, шундай уҡ шаян тонда. — Бары бер бөтә эштә лә тәүге ҡамытты үҙеңә кейергә тура килер.

Бөтә эштә лә үҙе башлап йөрөй торған бригадир Федор Иванович Теплов алға сығып, ҡулын һелтәп, орлоҡ тултырылған усын йәйеп ебәрҙе лә, бер аҙым яһаны. Ул аяҡтарын алыштырып сәсеп китте. Башҡалар ҙа урындарынан ҡуҙғалдылар. Һигеҙ кешенән торған төркөм ритмлы хәрәкәттәр менән берҙәм рәүештә сәсеүгә тотондолар.

Гектарына 10 килограмм клевер һәм 6 килограмм тимофеевка орлоғо сәсеү билдәләнелгән булһа ла, тәүҙә был норманы һаҡлау еңел булманы. Тубалдарға тултырып алынған орлоҡ йә етмәй, йә артып ҡала ине. Ҡул менән сәсеүҙә ҙур тәжрибәле Дмитрий Михайлович Медведев орлоҡто нисек уҫлап алырға һәм нисек тигеҙ аҙымдар яһарға кәрәклеген күрһәткәс кенә, эш яйға һалынды.

Бригадир Федор Теплов бөтә сәсеүселәрҙең дә оҫталыҡтарына ышанып еткәс, төшкө аштан һуң, уларҙы дүртәр-дүртәр итеп ике группаға бүлде. Тәүге аҙымдарҙан уҡ группалы һәм индивидуаль сдельщина ҡулланып эшләүҙең, кешеләрҙә бер-береһенән өлгө алыу тойғоһо уятыуҙың ҡиммәтен бригадир яҡшы белә ине. Эште тап бына шул рәүештә ойоштороу һөҙөмтәһендә уның бригадаһы үҙған ауыл хужалығы йылында алдынғылыҡҡа сыҡты һәм бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан, башҡа бригадаларға ҡарағанда, 2,3 центнерға артығыраҡ урожай алды. Тап бына шуның өсөн дә ул сәсеүҙе башлап ебәргәндә үҙе беренсе булып баҫыуға сыҡты.

Бригадир етәкселегендәге беренсе группа төшкө аштан һуң гектар ярым сәскәнсе, Николай Евдокимович Теплов группаһы үҙенең 1,8 гектарлыҡ участкаһын тамамланы. Бер нисә минутлыҡ ҡына ялға туҡталып, тәмәке тартып алған арала бригадир икенсе группаға барып, егеттәрҙе ҡотланы һәм уларға яңы участка бирҙе.

Үҙҙәрен ҙур тантана менән баҫыуға оҙатып ҡалған ауылдаштарының ышанысын аҡларға тырыштылар улар. Ҡояш байығанға тиклем бероү ҙә эште туҡтатыу тураһында һүҙ ҡуҙғатманы. Ҡүҙ байләнер ваҡыт еткәс кенә бригадир ике группаға ла бер урынға йыйылырға сигнал бирҙе.

— Бөгөн 23 гектарҙы әйләндерҙек, — тине ул. — Һәр беребеҙ өс гектар самаһы үлән сәстек.

Икенсе көндә Федор Теплов бригадаһы менән бергә Евдоким Теплов бригадаһының егеттәре лә баҫыуға сыҡтылар. Һабанға төшкәнгә тиклем ярыш ужымы өҫтөнә 60 гектар майҙанда үлән сәсеүҙе тамамларға кәрәк ине. Иртән ауыл урамдарында башланған йәнле хәрәкәт, шатлыҡлы, тантаналы ауаздар баҫыуға күсте. Бөтә йәй буйынса дауам ителәсәк баҫыу эштәренең башланыуы, игенселәрҙең мул урожай өсөн тәүге атлаҡаға ҡуҙғалыуҙары ине был.

Ғ. Әхмәтшин.

(Махсус хәбәрсебеҙ).

Иглин районы, «Новый путь» колхозы.

Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында

СССР Верховный Совете Президиумы Указы

Бөртөклө ашлыҡтар, техник һәм майлы культуралар, күп йыллыҡ үләндәрҙең урожайын күтәреү ауыл хужалығын артабан күтәреү эшендә бик мөһим бурыс булып торғанлығын иҫәпкә алып һәм бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцерканан һәм тимофеевканан юғары урожай алыу өсөн колхозсыларҙы, МТС һәм совхоз работниктәрен дәртләндереү маҡсатында СССР Верховный Совете Президиумы ҡарар итә:

1. Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан һәм клевер, люцерна, тимофеевка орлоҡтарынан һәр гектарҙан центнерҙарҙа урожай алыу буйынса 1948 һәм 1949 йылдарға түбәндәге күрһәткестәрҙе билдәләргә. Ошо күрһәткестәргә өлгәшкән ваҡытта ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланалар:

а) УССР-ҙың урман-ялан райондарында һәм Төньяҡ Кавказдағы дымлылыҡ етерлек булған райондарҙа:

Винница, Дрогобыч, Карпат арты, Каменец-Подольск, Киев, Кировоград, Львов, Станислав, Тернополь һәм Черновицы өлкәләрендә, Краснодар крайында, Кабарда АССР-ында, Төньяҡ Осетия АССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	32	26	24	21
Кукуруза	73	62	52	40
Дөгө	80	70	65	50
Шәкәр сөгөлдөрө	620	510	410	300
Көнбағыш	25	20	18	16
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	15	12	10	8
Клевер	6	5	4	3
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
Тимофеевка	7	6	5	4
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	22	20	19	17
Кукуруза	42	36	30	25
Дөгө	65	57	53	41
Шәкәр сөгөлдөрө	350	300	250	210
Көнбағыш	16	15	14	13
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	10	8	7	5
Клевер	4,5	3,7	3	2,2
Люцерна	4	3,4	2,8	2
Тимофеевка	5	4,3	3,6	3
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	24	22	21	18
Кукуруза	52	42	37	30
Дөгө	70	62	57	45
Шәкәр сөгөлдөрө	450	350	275	230
Көнбағыш	20	17	15	14
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	12	10	8	6
Клевер	5	4	3,5	2,5
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3
Тимофеевка	6	5	4,5	3,5

б) үҙәк ҡара тупраҡлы полоса райондарында: Воронеж, Курск, Орел, Полтава, Сумск, Тамбов, Харьков өлкәләрендә

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоз председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	31	25	23	20
Кукуруза	68	59	48	37
Шәкәр сөгөлдөрө	620	510	410	300
Көнбағыш	25	20	18	16
Клевер	6	5	4	3
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
Тимофеевка	7	6	5	4
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	21	19	18	16
Кукуруза	39	33	28	23
Шәкәр сөгөлдөрө	350	300	250	210
Көнбағыш	18	15	14	13
Клевер	4,5	3,7	3	2,2
Люцерна	4	3,4	2,8	2
Тимофеевка	5	4,3	3,6	3
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	23	21	20	17
Кукуруза	48	40	34	28
Шәкәр сөгөлдөрө	450	350	275	230
Көнбағыш	20	17	15	14
Клевер	5	4	3,5	2,5
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3
Тимофеевка	6	5	4,5	3,5

в) көньяҡтағы ялан райондарында:

Ворошиловград, Грозный, Днепропетровск, Запорожье, Измаил, Ҡырым, Николаев, Одесса, Ростов, Сталино, Херсон өлкәләрендә, Ставрополь крайында һәм Молдавия ССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	30	24	22	19
Кукуруза	68	59	48	37
Дөгө	80	70	65	50
Шәкәр сөгөлдөрө	620	510	410	300
Көнбағыш	25	20	18	16
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	15	12	10	8
Клевер	6	5	4	3
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	21	19	18	16
Кукуруза	39	33	28	23
Дөгө	65	57	53	41
Шәкәр сөгөлдөрө	350	300	250	210
Көнбағыш	18	15	14	13
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	10	8	7	5
Клевер	4,5	3,7	3	2,2
Люцерна	4	3,4	2,8	2
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	23	21	20	17
Кукуруза	48	40	34	28
Дөгө	70	62	57	45
Шәкәр сөгөлдөрө	450	350	270	230
Көнбағыш	20	17	15	14
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	12	10	8	6
Клевер	5	4	3,5	2,5
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3

г) СССР-ҙың көнсығыш райондарында:

Акмолинск, Көнсығыш Ҡаҙағстан, Иркутск, Кемерово, Кокчетавск, Курган, Кустанай, Новосибирск, Омск, Павлодар, Сахалин, Төньяҡ Ҡаҙағстан, Семипалатинск, Томск, Тюмень, Челябе, Чита өлкәләрендә, Түбә автономиялы өлкәһендә, Алтай, Краснояр, Приморье һәм Хабаровск крайҙарында, Башҡорт АССР-ында, Бурят-Монгол АССР-ында һәм Яҡут АССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	29	23	21	18
Дөгө	80	70	65	50
Шәкәр сөгөлдөрө	550	450	370	260
Көнбағыш	20	17	15	14
Клевер	5	4,2	3,5	2,5
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
Тимофеевка	6	5,2	4,3	3,4
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	20	18	17	16
Дөгө	65	57	53	40
Шәкәр сөгөлдөрө	280	260	220	170
Көнбағыш	16	13	12	10
Клевер	4	3	2,5	1,8
Тимофеевка	4,5	3,5	3	2
Люцерна	4	4	2,8	2
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	22	20	19	17
Дөгө	70	62	57	45
Шәкәр сөгөлдөрө	380	310	240	190
Көнбағыш	19	16	14	12
Клевер	4,2	3,5	3	2
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3
Тимофеевка	5	4	3,5	2,5

д) СССР-ҙың ҡара тупраҡлы булмаған райондарындағы полосаһында һәм төньяҡ-көнбайыш райондарында:

Архангель, Брянск, Великие Луки, Владимир, Вологда, Болынск, Горький, Житомир, Иваново, Калининград, Калинин, Калуга, Киров, Кострома, Ленинград, Молотов, Мәскәү, Мурманск, Новгород, Псков, Ровно, Рязань, Свердловск, Смоленск, Тула, Чернигов, Ярославль өлкәләрендә, Коми АССР-ында, Мари АССР-ында, Татар АССР-ында, Удмурт АССР-ында, Сыуаш АССР-ында, Белорус ССР-ында, Карел-Фин ССР-ында, Латыш ССР-ында, Литва ССР-ында һәм Эстон ССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	29	23	21	18
Шәкәр сөгөлдөрө	550	450	370	260
Көнбағыш	20	17	15	13
Клевер	5	4,2	3,5	2,5
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
Тимофеевка	6	5,2	4,3	3,4
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	20	18	17	16
Шәкәр сөгөлдөрө	280	260	220	170
Көнбағыш	16	13	12	10
Клевер	4	3	2,5	1,8
Люцерна	4	3,4	2,8	2
Тимофеевка	4,5	3,5	3	2
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	22	20	19	17
Шәкәр сөгөлдөрө	380	310	240	190
Көнбағыш	19	16	14	12
Клевер	4,2	3,5	3	2
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3
Тимофеевка	5	4	3,5	2,5

е) Кавказ арты райондарында:

Азербайжан ССР-ында, Әрмән ССР-ында һәм Грузин ССР-ында, Дағстан АССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	28	22	21	18
Кукуруза	73	62	52	40
Дөгө	80	70	65	50
Шәкәр сөгөлдөрө	620	510	410	300
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	88	72	62	40
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	62	52	42	25
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	15	12	10	8
Көнбағыш	25	20	18	16
Люцерна	5	4,5	3,5	2,5
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	19	17	16	15
Кукуруза	42	36	30	25
Дөгө	65	57	53	41
Шәкәр сөгөлдөрө	350	300	250	210
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	52	41	31	25
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	37	26	19	16
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	10	8	7	5
Көнбағыш	18	15	14	13
Люцерна	4	3,4	2,8	2
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	21	19	18	16
Кукуруза	52	44	37	30
Дөгө	70	62	57	42
Шәкәр сөгөлдөрө	450	350	275	230
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	57	47	36	30
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	42	32	21	17
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	12	10	8	6
Көнбағыш	20	17	15	14
Люцерна	4,5	4	3,2	2,3

ж) Урта Азия райондарында:

Алма-ата, Жамбул, Ҡыҙыл Орда, Талды-Курған, Көньяҡ Ҡаҙағстан өлкәләрендә, Ҡырғыҙ ССР-ында, Таджик ССР-ында, Төрөкмән ССР-ында һәм Үзбәк ССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау		
		Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре, трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	28	22	21	18
Кукуруза	73	62	52	40
Дөгө	80	70	65	50
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән шәкәр сөгөлдөрө	820	710	610	450
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	83	72	62	40
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	62	52	42	25
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән люцерна	9	8	6,5	4,5
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	19	17	16	15
Кукуруза	42	36	30	25
Дөгө	65	57	53	40
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән шәкәр сөгөлдөрө	500	450	400	350
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	52	41	31	25
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	37	26	19	15
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән люцерна	7	6	5	3,5
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	21	19	18	16
Кукуруза	52	44	37	30
Дөгө	70	62	57	42
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән шәкәр сөгөлдөрө	600	500	425	375
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	57	47	36	30
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән египет мамығы	42	32	21	17
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән люцерна	8	7	5,7	4

(Дауамы 3-сө биттә).

Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы Указы

(Дауамы. Башы 2-се биттә).

з) Көньяҡ-көнсығыш районларҙа:
Аҡтүбә, Астрахань, Гурьев, Көньяҡ Ҡазағстан, Ҡарағанда, Ҡуйбышев, Пенза, Саратов, Сталинград, Ульянов һәм Чкалов өлкәләрендә һәм Мордва АССР-ында

	Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү	Наградлау: Ленин ордене менән	Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән	„Хеҙмәт батырлығы өсөн" һәм „Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медалдәре менән
Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары һәм бригадирҙәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәре, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре, трактористәре, совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	25	20	19	17
Кукуруза	60	51	43	33
Шәкәр сөгөлдөрө	550	450	370	260
Көнбағыш	20	17	15	13
Клевер	5	4,2	3,5	2,5
Люцерна	4	3,6	2,8	2
Тимофеевка	6	5,2	4,3	3,4
МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	18	16	15	14
Кукуруза	35	30	25	20
Шәкәр сөгөлдөрө	280	260	220	170
Көнбағыш	16	13	12	10
Клевер	4	3	2,5	1,8
Люцерна	3,2	2,5	2	1,5
Тимофеевка	4,5	3,5	3	2
МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн:				
Бойҙай һәм арыш	20	18	17	15
Кукуруза	45	36	30	23
Шәкәр сөгөлдөрө	380	310	240	190
Көнбағыш	18	15	13	11
Клевер	4,2	3,5	3	2
Люцерна	3,8	3	2,5	1,8
Тимофеевка	5	4	3,5	2,5

2. Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүҙе, СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауҙы урожай ошо Указдың 1-се статьяһы менән билдәләнгән күләмдә алынған хәлдә башҡарырға. Сәсеү майҙаны кәмендә түбәндәгесә булырға тейеш:

а) УССР-ҙың урман-ялан районларында һәм Төньяҡ Кавказдың дымлылыҡ етерлек булған районларында:

Винница, Дрогобыч, Карпат арты, Каменец-Подольск, Киев, Кировоград, Львов, Станислав, Тарнополь һәм Черновицы өлкәләрендә, Краснодар крайында, Кабарда АССР-ында, Төньяҡ-Осетин АССР-ында

гектарҙарҙа

	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары өсөн	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары өсөн	Колхоз председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙары, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн	МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	МТС-тарҙың участка агрономдары һәм механиктәре өсөн	МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн
Бойҙай һәм арыш (бергә)	20	60	150	300	250	500	1000
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	600
Дөгө	5	20	40	70	100	200	400
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	4	12	25	50	50	100	200
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	100	200

б) Үҙәк ҡара тупраҡлы полоса районларында:
Воронеж, Курск, Орел, Полтава, Сумск, Тамбов, Харьков өлкәләрендә:

Бойҙай һәм арыш (бергә)	20	60	150	300	250	500	1000
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	600
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	100	200

в) Көньяҡтың ялан районларында:
Ворошиловград, Грозный, Днепропетровск, Запорожье, Измаил, Ҡырым, Николаев, Одесса, Ростов, Сталино, Херсон өлкәләрендә, Ставрополь крайында һәм Молдаван ССР-ында

гектарҙарҙа

	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары өсөн	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары өсөн	Колхоз председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙары, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн	МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	МТС-тарҙың участка агрономдары һәм механиктәре өсөн	МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн
Бойҙай һәм арыш (бергә)	20	60	150	300	250	500	1000
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	600
Дөгө	5	20	40	70	100	200	400
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	4	12	25	50	50	100	200
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	100	200

г) СССР-ҙың көнсығыш районларында:
Акмолинск, Көнсығыш Ҡазағстан, Иркутск, Кемерово, Кокчетавск, Курган, Кустанай, Новосибирск, Омск, Павлодар, Сахалин, Төньяҡ Ҡазағстан, Семипалатинск, Томск, Тюмень, Челябе, Чита өлкәләрендә, Түбә автономиялы өлкәһендә, Алтай, Краснояр, Приморье, Хабаровск крайҙарында, Башҡорт АССР-ында, Бурят-Монгол АССР-ында, Якут АССР-ында:

Бойҙай һәм арыш (бергә)	20	60	150	300	250	500	1000
Дөгө	5	20	40	70	100	200	400
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	·30	60	100	130	200	400
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	100	200

д) СССР-ҙың ҡара тупраҡлы булмаған полоса районларында һәм төньяҡ көнбайыш районларында:
Архангельск, Брянск, Великие Луки, Владимир, Вологда, Волынск, Горький, Житомир, Иваново, Калининград, Калинин, Калуга, Киров, Кострома, Ленинград, Молотов, Мәскәү, Мурманск, Новгород, Псков, Ровно, Рязань, Свердловск, Смоленск, Тула, Чернигов, Ярославль өлкәләрендә, Коми АССР-ында, Мари АССР-ында, Татар АССР-ында, Удмурт АССР-ында, Сыуаш АССР-ында, Белорус ССР-ында, Карел-Фин ССР-ында, Латыш ССР-ында, Литва ССР-ында һәм Эстон ССР-ында

гектарҙарҙа

	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары өсөн	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары өсөн	Колхоз председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙары, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн	МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	МТС-тарҙың участка агрономдары һәм механиктәре өсөн	МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн
Бойҙай һәм арыш (бергә)	12	30	75	200	150	300	600
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	150	200

е) Кавказ арты районларында:
Азербайжан ССР-ында, Әрмән ССР-ында, Грузин ССР-ында, Дағстан АССР-ында:

Бойҙай һәм арыш (бергә)	15	40	150	225	200	350	800
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	500
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	6	20	40	80	100	200	400
Һуғарылмай торған ерҙәргә сәселгән мамыҡ	4	12	25	50	50	100	200
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300

ж) Урта Азия районларында:
Алма-Ата, Жамбул, Ҡыҙыл Орда, Талды-Курган һәм Көньяҡ Ҡазағстан өлкәләрендә, Ҡырғыҙ ССР-ында, Таджик ССР-ында, Төрөкмән ССР-ында һәм Үзбәк ССР-ында

гектарҙарҙа

	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары звеноводтары өсөн	Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары өсөн	Колхоз председателдәре һәм агрономдары, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙары, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре өсөн	МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористәре өсөн	МТС-тарҙың участка агрономдары һәм механиктәре өсөн	МТС-тарҙың директорҙары, өлкән агрономдары, өлкән механиктәре өсөн
Бойҙай һәм арыш (бергә)	18	50	130	250	220	400	900
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	600
Дөгө	5	20	40	70	100	200	400
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Мамыҡ	6	20	40	80	100	200	400
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300

в) Көньяҡ-көнсығыш районларҙа:
Аҡтүбә, Астрахань, Гурьев, Көнбайыш Ҡазағстан, Ҡарағанда, Куйбышев, Пенза, Саратов, Сталинград, Ульянов, Чкалов өлкәләрендә һәм Мордва АССР-ында

Бойҙай һәм арыш (бергә)	20	60	150	300	250	500	1000
Кукуруза	10	30	60	100	150	300	600
Шәкәр сөгөлдөрө	3	10	20	50	65	130	300
Көнбағыш	10	30	60	100	130	200	400
Клевер	5	10	20	60	50	100	200
Люцерна	5	15	30	75	75	150	300
Тимофеевка	5	10	20	60	50	100	200

3. Колхозда бойҙайҙың һәм арыштың бөтә майҙаны ошо Указдың 2-се статьяһында билдәләнгәнгә ҡарағанда кәмерәк булғанда, ләкин 40 гектарҙан да кәм булмағанда, бойҙайҙан һәм арыштан ошо Указдың 1-се статьяһында билдәләнгән кимәлдә колхозда урожай алынған ваҡытта был колхоздарҙың председателдәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә һәм улар СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланыуға тапшырылалар.

4. Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙәренә һәм звеноводтарына, колхоздарҙың председателдәренә һәм агрономдарына, совхоз бүлексәләренең (фермаларының) управляющийҙәренә, агрономдарына, механиктәренә, трактор бригадалары бригадирҙәренә һәм трактористәренә, совхоздарҙың директорҙарына, өлкән агрономдарына, өлкән механиктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүҙе һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауҙы түбәндәге шарттар мотлаҡ үтәлгән ваҡытта башҡарырға.

а) Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү өсөн урожай йыйнауҙы планға ҡарағанда кәмендә 10 процентҡа арттырып үтәгәндә һәм Ленин ордене, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене һәм «Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградлау өсөн урожай йыйнау планын үтәгән хәлдә:

Звено тарафынан наградлау үткәрелә торған ашлыҡ культураһы сәсеүлегенең ҡалған майҙанына, һәм, бынан тыш звеноға беркетелгән башҡа бөтә культураларҙың бөтә сәсеүлек майҙанында;

баҫыусылыҡ бригадаһы, колхоз, совхоз бүлексәһе (фермаһы), совхоз тарафынан наградлау үткәрелә торған ашлыҡ культураһы сәсеүлегенең ҡалған майҙанында, ошо Указда күҙҙә тотолған бөтә бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм башҡа культуралары буйынса;

б) колхоз ауыл хужалығы продукцияларының бөтә төрҙәре буйынса мәжбүри поставкаларҙы һәм контрактацияны үтәгәндә һәм МТС эше өсөн натуралата түләүҙе үтәгәндә, ә совхоз государствоға ауыл хужалығы продуктыларын тапшырыу планын үтәгән хәлдә;

в) колхоз һәм совхоз алдағы йылда сәсеү өсөн бөтә культураларҙың орлоҡтары менән тулыһынса тәьмин ителгән ваҡытта;

г) совхоздар бүлексәләренең (фермаларының) трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористәре өсөн — бригада өсөн билдәләнгән трактор эштәре планын үтәгән хәлдә;

трактористар өсөн — тракторист трактор бригадаһында уртаса эшләп сығарыуҙан тыш кәм тигәндә 25 процентҡа артығыраҡ эшләгән хәлдә;

д) колхоздарҙың һәм совхоздарҙың айырыуса яҡшы өлгөләр күрһәткән работниктарен, юғары урожай алыуҙа уларҙың ниҫек ҡатнашыуҙарына ҡарап, Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградларға.

5. МТС-тарҙың директорҙарына, өлкән агрономдарына, өлкән механиктәренә, участка агрономдарына, участка механиктәренә, трактор бригадалары бригадирҙәренә һәм трактористәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүҙе һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауҙы түбәндәге шарттар мотлаҡ үтәлгән хәлдә башҡарырға;

а) Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн улар хеҙмәтләндерә торған колхозлар урожай йыйнау планын кәм тигәндә 5 процентҡа арттырып үтәгән хәлдә һәм Ленин ордене, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградлау өсөн наградлау үткәрелә торған ашлыҡ культураһы сәсеүлегенең ҡалған майҙанында, бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса тотош алғанда һәм ошо Указда күҙҙә тотолған башҡа культуралар буйынса урожай йыйнау планы үтәлгән хәлдә;

б) баҫыусылыҡ продукцияларының бөтә төрҙәре буйынса мәжбүри поставкалар һәм контрактациялар үтәлгәндә һәм хеҙмәтләндерә торған колхоздар буйынса тотош алғанда, МТС эше өсөн натуралата түләү үтәлгән хәлдә;

в) хеҙмәтләндерелә торған колхоздар алдағы йыл урожайы сәсеүлеге өсөн кәрәк күләмдә орлоҡтар менән тулыһынса тәьмин ителгән хәлдә;

г) МТС, участка һәм бригада буйынса трактор эштәре планы үтәлгәндә, ә трактористар өсөн, бынан тыш трактор бригадаһы буйынса уртаса эшләп сығарыуҙан кәм тигәндә 25 процент артығыраҡ эшләгән хәлдә;

МТС-тарҙың айырыуса өлгө күрһәткән работниктарен, уларҙың юғары урожай алыуға өлгәшеүҙә ниҫек ҡатнашлыҡ итеүҙәренә ҡарап, Ленин, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре, «Хеҙмәт батырлығы өсөн», һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградларға.

6. МТС һәм совхоз комбайнерҙарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүҙе һәм уларҙы СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауҙы түбәндәге шарттар үтәлгәндә башҡарырға:

а) комбайн менән 25 эш көнө эсендә кондициялы бөртөклө ашлыҡ һәм майлы культуралар кәм тигәндә түбәндәгесә миҡдарҙа һуғылып алынғанда:

Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн «Коммунар» һәм үҙе йөрөй торған С—4 комбайнына 7 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 1 мең центнер майлы культуралар һәм «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайнына 8,5 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 1,5 мең центнер майлы культуралар һуғып алған хәлдә;

(Аҙағы 4-се биттә).

Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыктан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында

СССР Верховный Совете Президиумы Указы

(Аҙағы. Башы 2-се, 3-сө биттәрҙә).

Ленин ордене менән наградлау өсөн—«Коммунар» комбайнына һәм үҙе йөрөй торған С—4 комбайнына 5,3 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 700 центнер майлы культуралар һәм «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайнына 7,2 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 800 центнер майлы культуралар һуғып алған хәлдә;

Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградлау өсөн—«Коммунар» комбайнына һәм үҙе йөрөй торған С—4 комбайнына 5 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 500 центнер майлы культуралар һәм «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайнына 6,4 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 600 центнер майлы культуралар һуғып алған хәлдә;

«Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградлау өсөн — «Коммунар» комбайнына һәм үҙе йөрөй торған С—4 комбайнына 2,7 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 300 центнер майлы культуралар һәм «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайндарына 3,6 мең центнер бөртөклө ашлык һәм 400 центнер майлы культуралар һуғып алған хәлдә;

б) урожай йыйнауҙы якшы сифатлы итеп юғалтыуһыҙ үткәргән хәлдә һәм урожай йыйнауҙан һуң комбайнды техник яктан якшы итеп һаклаған хәлдә;

в) тракторист булып яҙғы осорҙа тракторға сезон нормаһының кәм тигәндә 20 процентен эшләгән хәлдә һәм эшкәртелгән майҙанда күҙҙә тотолған ошо Указда ауыл хужалығы культураларынан план менән билдәләнгәндән кәм булмаған урожай алған хәлдә.

Комбайн агрегатының айырыуса өлгө күрһәткән работниктарен, уларҙың комбайн агрегатының юғары эшләп сығарыуға өлгәшеүендә катнашлык итеүҙәренә карап, Ленин ордене, Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене, «Хеҙмәт батырлығы өсөн» һәм «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградларға.

7. Наградлау үткәреләсәк культураларҙың урожай йыйнау планын тотош район буйынса үҙҙәренең эштәре менән арттырып үтәүҙе һәм тотош бөртөклө ашлык культуралары буйынса кәм тигәндә 15 процентка арттырып үтәүҙе тәьмин иткән хеҙмәтсәндәр депутаттарының район советы башкарма комитете председателдәренә, партияның район комитете секретарҙарына, район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәренә һәм был бүлектәрҙең баш агрономдарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә, урожай йыйнау планы кәм тигәндә 10 процентка арттырылып үтәлгән хәлдә юғарыла күрһәтелгән работниктар Ленин ордене менән наградлана, ә кәм тигәндә 5 процентка арттырылып үтәлгән хәлдә — Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланалар, тип билдәләргә.

Юғарыла күрһәтелгән работниктарға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре менән наградлау ошо Указ менән күҙҙә тотолған башка культуралар буйынса урожай йыйнау планын үтәлгән хәлдә, башкарыла.

Хеҙмәтсәндәр депутаттары район Советтәре башкарма комитеттәренең, партия район комитеттәренең һәм район ауыл хужалығы бүлектәренең айырыуса өлгө күрһәткән работниктәре районның колхоздарында һәм совхоздарында юғары урожай алыу эшен ойоштороуҙа катнашлык итеүҙәренә карап, СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланалар.

8. Хеҙмәтсәндәр депутаттары район Советтәре башкарма комитеттәренең, партия район комитеттәренең һәм район ауыл хужалығы бүлектәренең работниктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм уларҙы СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау түбәндәге шарттар мотлак үтәлгән хәлдә башкарырға:

а) районның тотош колхоздары буйынса ауыл хужалығы продукцияларының бөтә төрҙәре буйынса мәжбүри поставкаларҙы һәм контрактацияны һәм МТС эштәре өсөн натураль түләүҙе карар күләмдә, ә совхоздар буйынса ауыл хужалығы продукцияларының бөтә төрҙәре буйынса дәүләткә тапшырыу планын үтәгән хәлдә;

б) ошо район өсөн хужалыктың төп тармактары буйынса үстереү планын үтәгән хәлдә;

районның колхоздары, совхоздары алдағы йыл урожайы сәсеүлеге өсөн орлоктар менән тулыһынса тәьмин ителгән хәлдә.

9. Звено, бригада, совхоз бүлексәһе (фермаһы), колхоз, совхоз, МТС билдәләнгән күләмдәге майҙанда юғары урожай алып та, ләкин ошо Указда күҙҙә тотолған башка культуралар буйынса урожай йыйнау планы тейешле үтәлмәгән хәлдә, ошо Указда күрһәтелгән работниктар Социалистик Хеҙмәт Геройы исеменә һәм наградаларға тәкдим ителмәй, тип билдәләргә.

10. Звено, бригада, колхоз, совхоз бүлексәһе (фермаһы), МТС, совхоз тарафынан ошо Указда күҙҙә тотолған бер нисә культура буйынса юғары урожай алынған хәлдә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауға тапшырыу Указ буйынса наградланыу юғарырак дәрәжәһе күҙҙә тотолған культураларҙың береһе буйынса башкарыла, тип билдәләргә.

11. Был Указда урожайлылык буйынса күрһәткестәр буғарылмай торған ерҙәр менән һуғарылған өлкә, край һәм республикаларға культуралар һуғарыла торған ерҙәрҙә сәселгәндә, шулай ук субтропик культуралар райондарында 20 процентка арталар, тип билдәләргә.

12. Урожай йыйнау планының үтәлеүе һәм арттырылып үтәлеүе государство планы тарафынан билдәләнгән майҙандар һәм урожайлылык иҫәбенән сығып билдәләнә, ә сәсеүлектең фактик майҙаны планда каралған майҙандан артып киткән хәлдә урожай йыйнау планы сәсеүлектең фактик майҙаһынан һәм урожайлылык планынан сығып билдәләнә.

13. Урожайҙың фактик йыйымы бөртөклө, техник, майлы культураларҙы һәм башка ауыл хужалығы продукттары мотлак үлсәү юлы менән һәм уларҙы тейешле документтар менән приходка индереп билдәләнә, тип билдәләргә.

Бөртөклө ашлык, майлы культуралар, күп йыллык үлән орлоктарының һәм башка ауыл хужалығы культураларының урожайының фактик йыйым күләмдәре продукция государство әҙерләүҙәр ойошмалары тарафынан кабул итеп алған вакытта куйылған кондицияларҙы иҫәпкә алып билдәләнергә тейеш.

Районлар буйынса урожайҙың фактик йыйымы колхоздарҙың һәм совхоздарҙың йыллык отчеттары нигеҙендә билдәләнә.

14. Ошо Указға ярашлы рәүештә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә, СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауға тапшырыу колхоздар, МТС-тар, йылкысылык заводтары һәм үҙ системаһындағы совхоздар буйынсаа СССР Ауыл хужалығы Министерствоһы тарафынан һәм совхоздар буйынса СССР Совхоздар Министерствоһы тарафынан ауыл хужалығы йылының йомғактары буйынса хеҙмәтсәндәр депутаттарының өлкә һәм край башкарма комитеттәре, союзный һәм автономиялы республикаларҙың Министрҙәр Советтәренең — урожайлылыкты билдәләү буйынса район-ара государство инспекторҙары тарафынан тикшерелгән материалдары нигеҙендә башкарыла, тип билдәләргә.

СССР Верховный Совете Президиумы
Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Совете Президиумы
Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль,
24 апрель, 1948 йыл.

ВАТАН ҺУҒЫШЫ ИНВАЛИДТӘРЕ ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК

Өфө калаһының Киров район социаль тәьминәт бүлеге (мөдире иптәш Маков) Ватан һуғышы инвалидтәренә һәм һуғышта һәләк булыусылар семьяларына эшлекле ярҙам күрһәтә. Был районда даими рәүештә ярҙам комиссияһы эшләй.

Комиссия инвалидтәрҙе хеҙмәткә урынлаштырыу, профессияға өйрәтеү эше менән серьез шөғөлләнә. Ошо көндәрҙә генә 40 инвалид, профессияға эйә булырлык эшкә урынлаштырылды.

Бынан башка комиссия Киров районында йәшәгән инвалидтәр һәм һуғышта һәләк булыусылар семьяларының йорттарын тикшереп, ремонт талап ителгән торлактарҙы беренсе нәүбәттә төҙөкләндереү эшен башланы.

Район социаль тәьминәт бүлеге эргәһендә ярҙам кассаһы ойошторолоп, 120 мең һум акса тупланды. Ярҙам кассаһы инвалидтәргә һәм һуғышта һәләк булыусыларҙың семьяларына транспорт ярҙамы күрһәтеү өсөн бер автомашина һатып алды. Хәҙер 120 кубометр утын әҙерләнде.

Ағымдағы йылда индивидуаль баксаларҙы арттырыу өсөн күп кенә саралар күрелде. 40 гектар ер участкаһы билдәләнде. 12 тонна картуф орлоғо әҙерләнде.

—☆—

АУЫЛҒА КИТАПТАР

Башсоюздың культбазаһы райондарға колхозсылар өсөн күп һанда китаптар һәм брошюралар ебәрҙе. Был китаптар араһында МТС работниктәре өсөн «Трактор» һәм «Комбайн» тигән куланмалар, академик Цициндең «Культуралы үҫемлектәрҙең яңы төрҙәрен алыу юлдары» тигән брошюраһы һәм «Башкортостанда яҙғы бойҙай агротехникаһы» тигән брошюра һәм башкалар бар.

Когиз тарафынан леспромсоюз системаһындағы артелдәргә, райондарҙағы һал ағыҙыу контораларына 12 библиотека, шахматтар, шашкалар һәм доминалар, башкорт, татар һәм рус телдәрендә яҙылған 11600 һумлык китаптар ебәрелде. Был библиотекаларҙа ауыл хужалығы темаларына яҙылған махсус китаптарҙан башка художестволы әҙәбиәт тә бар.

—☆—

УРМАН ЭШСЕЛӘРЕНЕҢ ЯЛЫ

Урман эшселәренең һәм һал ағыҙыусыларҙың Башкортостан өлкә союзы ағымдағы йылда урындағы һәм союз күләмендәге һауыктырыу йорттарына республиканың урман хужалығы предприятиеларенән 300 эшсе ебәрә.

Өфө ял йортонда 135, Белоретта — 50 һәм Бәрә ял йортонда 15 кеше ял итәсәк. Бынан башка 40-ка якын эшсе һәм хеҙмәткәр Йоматау, Аксенов, Шафран, Аксаков, Красноусол һәм Янғын Тау санаторийҙарында ял итәсәктәр. Шулай ук 35 путевка союз әһәмиәтендәге курорттарға — Кисловодск, Батуми, Есентуки, Пятигорск һәм Железноводск курорттарына биреләсәк.

Атлантик-Ситиҙә Уоллестең сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 22 апрель (ТАСС). Кушма Штаттар президенте посына кандидат Уоллес, социаль тәьминәт работниктәренең Атлантик-Ситиҙә (Нью-Джерси штаты) бара торған милли конференцияһында сығыш яһап, «Кушма Штаттар Италияла баҫым аҫтында тауыштарҙы һатып ала алдылар», тип белдерҙе. «Ләкин, әгәр ҙә беҙ дуҫлык һатып алдык, тип иҫәпләһәк, ахмак булған булыр инек. Кушма Штаттар Италияла ике миллиард доллар расходландылар, ләкин Италия халкы проблемалары хәл ителмәгән әле һәм улар хәл ителеү юлында торалар. Италия халкы ерҙе кайтанан бүлеүгә, монополиялар өҫтөнән контроль итеүгә, промышленностең кайһы бер тармактарын национализациялауға, инфляцияға каршы һәм кара баҙарға каршы көрәш буйынса киҫкен сараларға мохтаж. Американың налог түләүселәре расходлаған аксаларға әлегә тиклем Италияла халык-ара картелдәр өсөн бары тик яңы юл куйыуҙар ғына һатып алынды... Италия хөкүмәте тейешле реформалар үткәрергә тейеш, йәки улай булмағанда, Кушма Штаттар Италия халкының күрә алмаусылығын һатып алғандар, булып сығыр».

Уоллес, АКШ-тың хәҙерге политикаһы «бында һәм сит илдә фашизмде үҫтереүгә ярҙам итә» тине. Уоллес, Американың һәр бер прогрессив тәклим яһалған вакытта коммунизм тураһында кыскырыусы реакционерҙәре «илдә социал тәьминәт, һаулык һаклау һәм мәғариф тураһында тейешле закондар сығарыуға каршы сығыш яһағандан һуң сит ил государстволарына ярҙам өсөн тауыш биргәндә гуманизмде яклаусы булып тормайҙар һәм был закон сығарыуға төрлө юлдар менән каршылык күрһәтәләр, тип билдәләне. Улар фактик алғанда, көньяктағы 7 штатта һайлау налогына сик куйыу һәм Көньяк Каролина штатында йәшерен тауыш биреү өсөн бер ниндәй ҙә саралар күрмәйҙәр икән, сит илдәрҙәге иркле һайлауҙарҙы яклаусы булып тормайҙар».

Уоллес Кушма Штаттарҙың государство секретаре Маршаллдың Боготала үткәрә торған политикаһын әлеккесә яңынан тәнкитләне. Ул бигерәк тә, Америка халкын, Боготала булған баш күтәреү «кыҙылдарҙың заговоры» булып тора, тип ышанырға мәжбүр итергә тырышыуҙарҙы ғәйепләне. «Шулай итеп, беҙҙе үҙебеҙҙең илебеҙҙә граждандар хокуғын тағы ла нығырак сикләргә мәжбүр итер өсөн һәм беҙҙең аксаларыбыҙҙы сит илдәге шәхси интерестәрҙе яклау маҡсатында коралланыуға расходлау өсөн, беҙгә кыҙылларға каршы вакцинаның яңы дозаһын индерәләр».

Уоллес, Кушма Штаттарҙың 1943 йылғы мәғлүмәттәренә карағанда, Колумбияла 180 миллион доллар тип әйтерлек суммала Американың айырым капиталы һалынған, унан 70 миллион доллар сумма нефть предприятиеларына һалынған, тип билдәләне. Уоллес былай тип белдерҙе: «Стандард ойл компани оф Нью-Джерсиҙең» филиалы «Троп икал ойл-компани» компанияһы Колумбиялағы нефть предприятиеларын контроллай. Был компания хәҙерге вакытта һуғыш диктатура урынлаштырырға теләгәнлектән түгел, ә ашаһылар килгәнлектән баш күтәреүсе эшселәргә бик түбән эш хакы түләй».

Уоллес государство департаментенең реакционер, колумбиялы Гоместе «Коминтерн» ярымшары коминтернға каршы өҫтең вариантын тыуҙырыу маҡсатында файҙаланыуын яңынан ғәйепләне.

Уоллес телмәренең калған өлөшө, башлыса, социаль тәьминәт баллар һәм әсәләр тураһында хәстәрлеккә карата Америка политикаһын тәнкитләүгә арналды. Уоллес түбәндәгеләрҙе белдерҙе: «Беҙ үҙ халкыбыҙҙың һаулығын һаклауҙа хурлыклы рәүештә артта калабыҙ. Һәр бер өс американың икеһе — йәғни 97 миллион кеше серьез ауырыуҙарҙы дауалау хакын түләү өсөн ярҙамға мохтаж». Уоллес, медицина учреждениеларында расовый дискриминация үткәрелә, был врачтарҙың һаулығы өҫтөмә рәүештә сикләй, тип айырыуса билдәләне.

Уоллес Кушма Штаттарҙың һаулык һаклау мәсьәләләре буйынса халык-ара ойошма уставын әлегә тиклем ратификацияламауы фактын бик нык ғәйепләне. Уоллес былай тине: «Кушма Штаттарға һаулык һаклау мәсьәләләре буйынса халык-ара ойошмаға ярҙам итеү өсөн 2 миллион доллар ассигновать индерергә һорап мөрәжәғәт иттеләр. Беҙ коралланыуға миллиардланған долларҙар ташлайбыҙ, ләкин бөтә донъя халыктарының һаулығы Трумэн доктринаһы ялыкшы кешеләр өсөн киҫкен проблема булып тормай, улар халыкка ярҙам итеү менән кыҙыкһынмайҙар».

Уоллес, сенат комиссияһының һаулык һаклау мәсьәләләре буйынса халык-ара ойошмала Кушма Штаттарҙың катнашыуын тәьмин итеү өсөн кәрәкле закондар сығарыуҙы хупламағанлығын, сәнки был ойошманы медицинаны специализациялаштырыуға юнәлтелгән «бөтә донъя заговорын» тормошка ашырыусы ойошма, тип ғәйепләгәнлеген билдәләне. Шулай итеп, дөйөм якшы көн-күреш кә кағылышлы тәкдим тағы ла «кыҙыл тәкдим» тип аталды.

Һөҙөмтәләү һүҙе итеп Уоллес әгәр ҙә Берләшкән милләттәр ойошмаһы принциптәре еренә еткерелмәһә, тыныслык тәьмин ителә алмаясак, тине. Өсенсө партия ошо принциптар буйынса эшләйәсәк, тине Уоллес, «был принциптәрҙең иҫке хәрби партиялар тарафынан былсыракка буялғаны нисек дөрөҫ булһа, был да шулай ук дөрөҫ».

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

«Башнефтезаводтар» берекмәһенә даими эшкә хеҙмәтте нормалаштырыусы инженер, өлкән бухгалтер-ревизор кәрәк. Тәкдимдәр менән мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө калаһы, Пушкин урамы 85, 4-се кат 67-се бүлмә.

ОРС теләгән күләмдә, беренсе сортлы тоҙлаған кәбеҫтә һатылыу тураһында иғлан итә. Белешеү өсөн адрес: Өфө калаһы, Революцион урамы, йорт номере 37. Телефон номере 2-70-88.

Нефтселәрҙең яңы коллектив договоры

Октябрьск калаһындағы нефть промышленносе предприятиеларенда администрация менән профсоюз ойошмалары араһында яңы, 1948 йылға коллектив договор төҙөү эше тамамланды.

«Туймазынефть» тресы системаһындағы бөтә предприятиеларенда, атап әйткәндә, бораулау конторалары, промыселдарҙа, төҙөләш-монтаж, транспорт контораларында һәм башка ойошмаларында эшсе, инженер-техниктар һәм хеҙмәткәрҙәрҙең дөйөм йыйылыштары уҙғарылды, һәм уларҙа үткән йылғы договорҙың үтәлеше һәм яңы коллектив договорҙың бурыслары киң рәүештә тикшерелде.

Эшселәр үткән йылда трест тарафынан договорға алынған кайһы бер пункттарҙың, бигерәк тә техника һәм эксплоатация планының үтәлеүе тәьмин ителмәүен, хеҙмәтте һаклауҙа, культура-тормош яғынан хеҙмәтләндереүҙә кәмселектәр булыуын ныҡ тәнкитләне. Улар трестан бындай бороклыкты кырка бөтөрөү, договорҙа каралған бөтә пункттарҙы ла теүәл үтәлеүен талап иттеләр.

Йыйылыштарҙа яңы договорға бик күп тәкдимдәр индерелде һәм тәкдимдәрҙе йыйнау өсөн махсус комиссиялар төҙөлдө. Комиссиялар тарафынан цехтарҙа, бригадаларҙа, контораларҙа киң аңлатыу эше ойошторолоп, эшселәрҙән меңдәрсә тәкдимдәр йыйналды.

1948 йылғы коллектив договорға индерелгән төп мәсьәләләрҙән түбәндәгеләрҙе күрһәтергә кәрәк. Производство планы буйынса: үткән йылға карағанда бораулауҙа проходканы бөтә трест буйынса 173 процент арттырырға; нефть һәм газ сығарыуҙы 24 процентка арттырырға. Хеҙмәт етештереүсәнлеген эксплоатацияла планда билдәләнгәндән тыш — 1, бораулауҙа — 13, төҙөлештә — 15 процентка күтәрергә. Бораулауҙа һәм эксплоатацияла, төҙөлештә билдәләнгән үҙенә төшөү хакын түбәнәйтеү заданиеһен үтәргә.

1948 йылда бер станок-айға 1000—1200 метр бораулау тиҙлегенә өлгәшеү өсөн һәр бораулау контораһында ике-өс тәжрибә скважинаһы бораулауға һәм был өлкәлә алдынғы мастерҙар Балабанов, Алексеев, Кнутов, Бикбов иптәштәр кеүек новаторҙарҙың эш методтарын киң йәйелдерергә. Шулай ук балокәй механизмде киң кулланырға.

Хеҙмәт һәм һаулык һаклау, коммуналь-тормош учреждениеларе, торлактар төҙөлеше буйынса ла күп кенә практик саралар индерелде. Мәҫәлән, ағымдағы йылда нефтселәр өсөн 40 мең квадрат метр торлак майҙаны төҙөү, Октябрьскиҙа, Нарышта мунса-кер йыуыу бинаһы төҙөү, каланы газификациялауҙы тамамлау һәм башкалар договорҙа мөһим мәсьәләләрҙең береһе итеп күрһәтелде.

Яңы коллектив договор буйынса администрацияға 800 эшсе кадрҙар әҙерләү, 1430 работниктең квалификацияһын күтәреү, йәштәр өсөн киске мәктәп ойоштороу, укыу комбинаты төҙөү мәсьәләләре бурыс итеп куйылды.

Был ҙур бурыстарҙы тормошка ашырыу «Туймазынефть» тресы етәкселәренән, эшселәр, инженер-техник работниктәр һәм хеҙмәткәрҙәр коллективтәренән социалистик ярышты киң йәйелдереп ебәреүҙе, ныкышмалы эшләүҙе талап итәсәк. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыкты дүрт йылда үтәүҙе тәьмин итеүгә юнәлтелгән был мөһим документ трест администрацияһы һәм эшселәр коллективе өсөн эш программаһы булып әүерелергә тейеш. Был, урындағы партия һәм профсоюз ойошмалары алдына массаны мобилизовать итеүҙә ҙур бурыстар йөкмәтә.

Октябрьск нефтселәре 1948 йылға алған йөкләмәләрен һәм бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрен намыҫлы рәүештә үтәп сығырға тейештәр.

Х. Маннанов.

ССР Союзы Министрҙәр Советы бойороғона ярашлы рәүештә, телефон аппараттары заводы тресының эшселәр тәьминәте бүлеге (ОРС) электротехника оборудованиелар заводы эшселәр тәьминәте бүлеге менән берләштерелә. Берләштерелгән ОРС электротехника оборудованиелар заводы эргәһендә була.

Телефон аппараттары заводы ОРС-ына дәғүәләре булған ойошмалар, учреждениелар һәм айырым кешеләр 1948 йылдың 5 майына тиклем мөрәжәғәт итергә тейештәр. Күрһәтелгән сроктан һуң дәғүәләр кабул ителмәй.

Ликвидком.

Редакцияның адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26.

П00726 Өлкә газета-журналдар типографияһы. А. — 2. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
1948 йыл
№ 85
28
апрель
шаршамбы
хаҡы 20 тин

Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн, совет халҡының материаль көн-күрешен һәм культураһын артабан күтәреү өсөн көрәштә алға, яңы еңеүҙәргә!

(1948 йылдың 1 майына ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙарынан).

1948 ЙЫЛДЫҢ 1 МАЙЫНА ВКП(б) ҮҘӘК КОМИТЕТЕНЕҢ САҠЫРЫУҘАРЫ

1. Йәшәһен 1 Май — бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнө!

2. Демократияның һәм социализмдең еңеүе өсөн көрәшеүсе халыҡтарға сәләм!

3. Йәшәһен ныҡлы тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡтарҙың дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлеге!

4. Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Империалистарҙың — яңы һуғыш уты тоҡандырыусыларҙың агрессив уйҙарын фаш итегеҙ! Тыныслыҡ эшен һаҡлауҙа ныҡ тороғоҙ!

5. Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Үҙегеҙҙең азатлығығыҙ һәм бойондороҡһоҙлоғоғоҙ өсөн көрәштә көстәрегеҙҙе туплағыҙ! Халыҡтарҙы иҙеүсе һәм ҡол итеүсе империалистик пландарҙы өҙөгөҙ!

6. Йәшәһен бөйөк Советтәр Союзы — тыныслыҡтың һәм именселектең, халыҡтар азатлығының һәм бойондороҡһоҙлоғонон ышаныслы терәге!

7. Тыуған илебеҙҙең азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон намыҫ менән һаҡлап алып ҡалған Совет Армияһына — азат итеүсе армияға дан!

8. Советтәр Союзының ҡоро ер, хәрби-һауа һәм хәрби-диңгеҙ көстәренең воиндәре! Үҙегеҙҙең хәрби һәм политик белемдәрегеҙҙе арымай-талмай күтәрегеҙ, бөйөк Ватан һуғышының тәжрибәһен үҙләштерегеҙ! Үҙегеҙҙең боевой оҫталығығыҙҙы камиллаштерегеҙ! Совет государствоһының Ҡоралы Көстәренең ҡеүәтен нығытығыҙ!

9. Йәшәһен Тыуған илебеҙҙең мөҡәддәс сиктәрен һиҙгер һаҡлаусы совет пограничниктәре!

10. Советтәр Союзы Геройҙарына һәм Социалистик Хеҙмәт Геройҙарына — Тыуған илебеҙҙең иң яҡшы улдарына һәм ҡыҙҙарына дан!

11. Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн, совет халҡының материаль көн-күрешен һәм культураһын артабан күтәреү өсөн көрәштә алға, яңы еңеүҙәргә!

12. Советтәр Союзының хеҙмәтсәндәре! Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылының планын бөтә төр продукциялар буйынса срогынан алда үтәйек!

13. Советтәр Союзының хеҙмәтсәндәре! Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ныҡлы экономия режиме өсөн, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм сифатын яҡшыртыу өсөн көрәшегеҙ! Хеҙмәт етештереүсәнлегең арымай-талмай күтәрегеҙ!

14. Күмер промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Шахталарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм төҙөү темпын юғарыраҡ күтәрегеҙ! Күмер сығарыуҙы бөтә саралар менән арттырығыҙ!

15. Нефть промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Нефть сығарыу һәм эшкәртеү темпын юғарыраҡ күтәрегеҙ! Яңы нефть ятыштарын йәһәтерәк үҙләштерегеҙ! Халыҡ хужалығы өсөн күберәк нефть продукттары бирегеҙ!

16. Ҡара һәм төҫлө металлургия эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Металл етештереүҙең ҡеүәтле күтәрелешен тәьмин итәйек! Халыҡ хужалығына күберәк суйын, ҡорос, прокат, төҫлө металдар бирәйек!

17. Электр станцияларының эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы электр ҡеүәттәрен тиҙерәк хәрәкәткә индерегеҙ! Халыҡ хужалығын электр энергияһы менән тәьмин итеүҙе яҡшыртығыҙ!

18. Машиналар төҙөү промышленносе предприятиеләренең эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Илебеҙҙең халыҡ хужалығын алдынғы техника менән ҡоралландырығыҙ! Промышленность, транспорт, ауыл хужалығы өсөн күберәк машиналар бирегеҙ!

19. Автомобиль һәм трактор промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы автомобилдәр эшләп сығарыуҙы бөтә саралар менән арттырығыҙ! Тракторҙар эшләп сығарыуҙы өҙлөкһөҙ күтәрегеҙ!

20. Химия промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Илдең халыҡ хужалығы өсөн химик продукттар эшләп сығарыуҙы арттырығыҙ!

21. Суднолар төҙөү промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы караптарҙы тиҙерәк төҙөгөҙ! Совет державаһының ҡеүәтле флотын булдырайыҡ!

22. Төҙөүсе эшселәр һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙар, инженерҙәр һәм техниктәр! Төҙөлөш темпын юғарыраҡ күтәрегеҙ! Төҙөү эштәрен механизациялау өсөн көрәшегеҙ! Төҙөлөштең үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтегеҙ һәм сифатын яҡшыртығыҙ! Яңы предприятиеләрҙе, торлаҡтарҙы, культура учреждениеләрен тиҙерәк стройға индерегеҙ!

23. Төҙөлөш материалдары промышленносеның эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Яңы производство ҡеүәттәрен тиҙерәк хәрәкәткә индерегеҙ! Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың төҙөлөштәренә күберәк цемент, кирбес, быяла, ябыу һәм башҡа материалдар бирегеҙ!

24. Урман промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Төҙөлөштәргә, шахталарға һәм тимер юлдарға күберәк ағас материалдары бирегеҙ!

25. Туҡыу һәм еңел промышленность эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Халыҡ өсөн туҡымалар, кейем-һалым, аяҡ кейемдәре, трикотаж һәм башҡа тауарҙар етештереүҙе бөтә саралар менән арттырығыҙ! Продукцияның ассортиментын киңәйтегеҙ һәм сифатын күтәрегеҙ!

26. Аҙыҡ, ит-һөт һәм балыҡ промышленносе эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Туҡланыу продукттарын етештереүҙе киңәйтегеҙ, уларҙың сифатын яҡшыртығыҙ! Халыҡ өсөн күберәк шәкәр, май, ит-һөт, балыҡ һәм башҡа продукттар бирегеҙ!

27. Урындағы промышленность һәм промысловый кооперация работниктәре! Урындағы сырьенан күберәк тауарҙар эшләп сығарығыҙ! Хеҙмәтсәндәрҙең тормош ихтыяждарын хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртығыҙ!

28. Ҡала хужалығы һәм торлаҡ төҙөлешө эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, инженерҙәре һәм техниктәре! Ҡалаларҙы һәм эшселәр посёлкаларын төҙөкләндереү өсөн көрәшегеҙ! Торлаҡ һәм культура төҙөлөшөнөң темпын күтәрегеҙ һәм сифатын яҡшыртығыҙ!

29. Совет тимер юлсылары! Тимер юлдарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм төҙөү темптарының юғары булыуы өсөн көрәшегеҙ! Вагондарға йөк тейәүҙе арттырығыҙ һәм уларҙың әйләнешен тиҙләтегеҙ! Пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртығыҙ!

30. Диңгеҙ һәм йылға флоты работниктәре! Халыҡ хужалығы өсөн йөк ташыуҙы арттырығыҙ! Судноларҙың әйләнешен тиҙләтегеҙ! 1948 йылдың навигацияһын уңышлы үткәреү өсөн көрәшегеҙ!

31. Ауыл хужалығы эшсәндәре! Социалистик игенселекте һәм малсылыҡты артабан күтәреү өсөн бөтә көстәрегеҙҙе бирегеҙ! Халыҡ өсөн аҙыҡ-түлек һәм промышленность өсөн сырьё муллығын булдырайыҡ!

32. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, крәҫтиәндәр һәм крәҫтиән ҡатын-ҡыҙҙары, ауыл хужалығы специалистәре! Сәсеү кампанияһын уңышлы үткәреү буйынса эште киң йәйелдерегеҙ!

33. Үҙҙәренең батыр, фидаҡәр хеҙмәттәре менән Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыуға өлгәшкән юғары урожай мастерҙарына — колхозсыларға һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарға, МТС һәм совхоз эшселәренә һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙарына, ауыл хужалығы работниктәренә дан! Ауыл хужалығы алдынғыларына — орденлеләргә дан!

34. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, ауыл хужалығы специалистәре! Социалистик игенселектең культураһын күтәрегеҙ! Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бөтә сәсеү майҙандарынан юғары урожай алыуға өлгәшегеҙ! Ауыл хужалығы алдынғыларының, орденлеләрҙең һәм Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының сафтарын арттырығыҙ!

35. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, совхоз эшселәре һәм эшсе ҡатын-ҡыҙҙары, зоотехниктәр һәм ветеринарҙар! Малдар һанын арттырығыҙ һәм малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген бөтә саралар менән күтәрегеҙ! Халыҡ өсөн күберәк һөт, май, ит һәм башҡа продукттар бирегеҙ!

36. МТС һәм совхоз трактористтәре, комбайнерҙәре, механиктәре! Тракторҙарҙа һәм комбайндарҙа юғары эш күрһәткестәре өсөн көрәшегеҙ! Баҫыу эштәренең сифатын күтәрегеҙ, юғары урожай алыуға өлгәшегеҙ!

37. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар! Колхоздарҙың общественный хужалығын бөтә саралар менән үҫтерегеҙ, хеҙмәт дисциплинаһын нығытығыҙ! Ауыл хужалығы артеле Уставын — колхоз тормошоноң төп законын мөҡәддәс рәүештә еренә еткерегеҙ!

38. Совет сауҙаһы, кооперация, общественный туҡланыу работниктәре! Ҡалала һәм ауылда культуралы совет сауҙаһын бөтә саралар менән киңәйтегеҙ! Совет потребителдәрен хеҙмәтләндереүҙе яҡшыртығыҙ!

39. Государство учреждениеләренең хеҙмәткәрҙәре! Совет аппаратының эшен яҡшыртығыҙ, государство дисциплинаһын нығытығыҙ, хеҙмәтсәндәрҙең талаптарына һәм ихтыяждарына һиҙгер мөнәсәбәт итегеҙ!

40. Совет фәне работниктәре! Илебеҙҙең фәнен һәм техникаһын яңы тикшеренеүҙәр, уйлап сығарыуҙар һәм яңылыҡтар менән байытығыҙ! Фән ҡаҙаныштарын производствоға индерегеҙ, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында техник прогрестең артабан үҫешен тәьмин итегеҙ!

41. Әҙәбиәт, искусство, кинематография работниктәре! Бөйөк совет халҡына лайыҡ булған юғары идеялы художество әҫәрҙәре тыуҙырығыҙ!

42. Уҡытыусылар һәм уҡытыусы ҡатын-ҡыҙҙар, халыҡ мәғарифе работниктәре! Балаларҙы уҡытыу сифатын күтәрегеҙ! Беҙҙең йәштәребеҙҙе совет патриотизмы рухында, социалистик Тыуған илебеҙгә фидаҡәр бирелгәнлек рухында тәрбиәләгеҙ!

43. Ватан һуғышы инвалидтарын һәм Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн үҙҙәренең ғүмерен биргән героик совет воиндәренең семьяларын бөтә халыҡ хәстәрлеге менән солғап алайыҡ!

44. Совет профсоюздары! Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Производство новаторҙарының тәжрибәһен таратығыҙ! Эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең материаль һәм культура тормош кимәлен күтәреү тураһында арымай-талмай хәстәрлек күрһәтегеҙ!

45. Совет ҡатын-ҡыҙҙары! Социалистик Тыуған илебеҙҙең артабан сәскә атыуы өсөн көрәшегеҙ! Йәшәһен совет ҡатын-ҡыҙҙары — илебеҙҙең политик, хужалыҡ һәм культура тормошонда актив ҡатнашыусылар!

46. Совет егеттәре һәм ҡыҙҙары! Алдынғы техникаға, фәнгә, культураға эйә булығыҙ! Ныҡ һәм ҡыйыу булығыҙ, теләһә ниндәй ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығырға әҙер тороғоҙ! Тыуған илебеҙҙең бәхете өсөн фидаҡәр рәүештә хеҙмәт итегеҙ!

47. Совет мәктәбе уҡыусылары! Белемдәргә арымай-талмай эйә булығыҙ, Ленин—Сталин эше өсөн ныҡлы көрәшселәр булырға әҙерләнегеҙ!

48. Коммунистар һәм комсомолецтар! Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн, Ватаныбыҙ хужалығының һәм культураһының яңы ҡеүәтле күтәрелеше өсөн, Совет государствоһының ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн көрәшеүселәрҙең алдынғы сафтарында булығыҙ!

49. Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ — беҙҙең илебеҙ халыҡтарының дуҫлығы һәм данының ныҡлы нигеҙе!

50. Йәшәһен бөйөк большевиктар партияһы, совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы Ленин—Сталин партияһы!

51. Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә, коммунизмдең еңеүенә табан алға!

Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) Партияһы Үҙәк Комитеты.

Художник А. Кокорекин эшләгән плакатты «Искусство» издательствоһы 1 Майға ҡарата баҫып сығарҙы. ТАСС фотохроникаһы.

Республикабыҙҙың эшсәндәре Май Байрамын хеҙмәт еңеүҙәре менән ҡаршылайҙар

Производство уңыштары

Өфө тау оборудованиеләре заводының баш инженеры Маринин иптәш беҙҙең хәбәрсебеҙгә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

— Тау оборудованиеләре заводы коллективы май алды социалистик ярышына ҡушылып, производство күтәрелешенә өлгәште. Дүрт айлыҡ производство планы срогынан алда тамамланды. Хәҙер коллектив биш айлыҡ планды Беренсе майға үтәү юлында фидаҡәр көрәшә.

Завод ҡыҫ айҙа индерелгән рационализация тәҡдимдәренән 40 мең һум экономия алды. Шул ваҡыт эсендә рудниктәр өсөн вентиляторҙар, дизель моторҙарына запас частар, шахталар һәм рудниктәр оборудованиеларын етештереү үҙләштерелде.

Завод эшселәре Май Байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып ҙур күтәренкелек менән эшләйҙәр, заводта 21 эшсе биш йыллыҡ заданиеһе үтәп сыҡты. Улар араһында токарь Шулепов, Васильков, Васильева, Ғазизов һәм башҡа иптәштәр бар. Иҫәҙән артыҡ эшсе өс йыллыҡ заданиеһе үтәп, дүртенсе йыл иҫәбенә эшләй. Токарь Шадрин, Иванов, Суздальцев, Перминов иптәштәр май алды ярышында көндәлек нормаларҙы 250—300 процентҡа үтәйҙәр.

Хәҙерге көндә заводты киңәйтеү һәм реконструкция эштәре башланды. Цехтарға яңы станоктар ҡуйыла, был эштәр Беренсе майға тамамланасаҡ. Шуның менән бергә энергияны көсәйтеү өсөн бер бәләкәй электр станцияһы һалына. Ошо йылдың аҙағында заводтың производство ҡеүәте 1,5 тапҡырға артасаҡ. Завод киңәйтелеү менән бергә эшселәр һәм инженер-техник работниктәр өсөн торлаҡтар төҙөүгә ҙур әһәмиәт бирелә. Хәҙер эшселәр өсөн 18 квартиралы ҙур бина һалына башланы ла инде.

Май айы планы иҫәбенә

Черниковск машиналар төҙөү заводында бынан бер ай элек алдынғы цехтар Май байрамын лайыҡлы ҡаршылау өсөн стахановсы вахтаға баҫҡайнылар. Улар инде производство еңеүҙәре тураһында рапорт бирәләр.

Парторгы иптәш Нурушев булған цех эшселәре апрель айы заданиеһен срогынан 10 көн алда тамамлап, инде май айы иҫәбенә эшләйҙәр.

Начальнигы иптәш Гребенюк булған цехтың мастер иптәш Лобрецов етәкселек иткән смена коллективы 22 апрелгә айлыҡ планды үтәү тураһында рапорт бирҙе. Цехтың алдынғы стахановсылары Барчук, Алексеев, Ғәйнетдинов һәм Вәлиуллин иптәштәр смена һайын икешәр норма үтәйҙәр.

М. Мостафин.

Баҫыуҙарҙа стахановсы эш

САҠМАҒОШ. (Телефон аша). Районның игенселәре бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең бөйөк байрамы — Беренсе Майҙы колхоз баҫыуҙарында стахановсы эш менән билдәләйҙәр.

«Байраҡ» һәм «Ударсы» колхоздары байрамды ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу планын арттырып үтәү менән ҡаршылаҙылар. «Боевик», «Красный ҡараван», Киров һәм Буденный исемендәге колхоздарҙа ла баҫыу эштәре ойошҡан рәүештә бара. Был колхоздар 60—65-әр гектар майҙанда ужымды аҙыҡландырҙылар. Район буйынса бөтәһе 1000 гектарҙан артыҡ майҙанда ужым аҙыҡландырылды.

М. Еникеева.

Ярышып эшләйҙәр

КРАСНОУСОЛ. (Телефон аша). Ғафури районы колхоздарында яҙғы баҫыу эштәре киңдән-киң ҡыҙа. Юғары урожай үҫтереү өсөн көрәшеүсе звенолар ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландыралар. «Иген йылға» колхозында 20, «Ҡормантау» колхозында 17 һәм «Туғай» колхозында 5 гектар ужымға ашлама индерелде.

«Яңы тормош» колхозында агротехник иптәш Фәткуллин етәкселегендә ужым аҙыҡландырыуҙа ҡатнашыусы звенолар үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Зәһрә Солтанова, Хәдисә Мөхәмәтьянова һәм Рәбиғә Әзнабаева иптәштәрҙең звенолары алда баралар. Колхозда инде 20 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды.

Ногмән Ғәлиев.

ДОКЛАДСЫЛАРҒА ЯРҘАМҒА

Беренсе Май—бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең көстәренә босвой смотр көнө

Бөтә донъяның хеҙмәтсәндәре 1948 йылдың Беренсе Майын империалистәргә ҡаршы, демократик лагерҙең артабан үҫеүе һәм нығыуы, империализм һәм реакция көстәренең йомшарыуы обстановкаһында ҡаршылайҙар.

Демократик лагерҙең башында тороусы бөйөк совет халҡы һуғыш әҙемталарын бөтөрөү эшендә иң ҡыйын бурыстарҙы хәл итте. Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә бөтә ҡыйынлыҡтарҙы һәм тотҡарлыҡтарҙы еңеп, ул социалистик общество төҙөүҙе уңышлы тамамлай һәм коммунизмға бара.

Бөтә донъяның демократик көстәре Советтар Союзы тирәһенә туплана. Халыҡ демократияһы илдәрендә хеҙмәтсән синыфтарҙың блогы нығыны, реакция тарафынан әҙерләнгән заговорҙар фаш ителде һәм бөтөрөлдө. Был илдәрҙең хеҙмәтсәндәре социаль-экономик яҡтан тамырынан үҙгәртеп ҡороллоуға өлгәштеләр һәм социализмға алып бара торған юлға баҫтылар. Шуның менән бергә, демократия көстәре донъяның башҡа бөтә илдәрендә лә нығыныдылар. Халыҡтарҙың милли суверенитеты өсөн һәм улар араһында ныҡ тыныслыҡ өсөн көрәштең авангардында барыусы коммунистик партияларҙың йоғонтоһо бөтә урында ла үҫә.

Империалистик лагерь социализм һәм демократияның тайпылышһыҙ үҫешен туҡтатырға маташа. Америка империалистәре уң социалистәр лагеренән булған үҙҙәренең эйәрсендәренең булышлығы менән актив агрессив политика алып баралар. Улар бөтә донъяла Америка монополияһының хакимлеген урынлаштырырға һәм халыҡтарҙы ҡоллоҡҡа төшөрөргә тырышалар. Донъяның күп илдәрендә хеҙмәтсәндәр өҫтөнә полицияның ҡаты терроры ташлана. Цивилизацияны ҡол биләүселәр ҡан һәм тимер менән колониаль режимде ялҡҡа баҫтырырға ынтылалар. Ләкин тарих тәгәрмәсен артҡа табан тәгәрәтеү мөмкин түгел. Социализм һәм демократия лагере уның дошмандары лагерена ҡарағанда тиңләштергеһеҙ рәүештә көслө һәм ҡеүәтле. «Социализм һәм демократия еңелмәслек». (Сталин).

* * *

Совет халҡы 1948 йылдың беренсе майына социалистик төҙөлөштөң бөтә участкаларында ғәйәт ҙур уңыштар менән килде. Был уңыштарҙа капиталистик ҡоролошҡа ҡарағанда социалистик ҡоролоштоң ҙур өҫтөнлөгө бик асыҡ күренеп тора. Капиталистик илдәрҙә һуғыштан һуңғы осорҙа производствоның түбән төшөүе күрелә. Мәҫәлән, АҠШ-та, һуғыш ваҡыты менән сағыштырғанда, 1947 йылдың аҙағына промышленность продукцияһы етештереп сығарыу кимәле 25 процентҡа кәмене. Англия, Франция һәм Көнбайыш Европаның башҡа илдәренең экономикаһы бик ауыр хәлгә ҡалды, уларҙың хакимлек итеүсе синыфтары халыҡтарҙы Америка империализмы ҡоллоғона һаталар. Был илдәр һуғыштан һуңғы ҡыйынлыҡтар һаҙлығынан йырынып сыға алмайҙар.

Быға ҡапма-ҡаршы рәүештә Советтар Союзында икенсе эш ҡайнай. Илдең эске ресурстарына таянып һәм социалистик хужалыҡтың өҫтөнлөгөн киң файҙаланып, большевистик партия тарафынан етәкселек ителгән совет халҡы промышленность производствоһының һуғышҡа тиклемге кимәленә уҙып китеү, капиталь төҙөлөштөң бик ҙур программаһын тормошҡа ашырыу, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарының техник ҡоралланышын тағы ла юғарыраҡ күтәреү өсөн рухланып көрәшә.

Һәм совет халҡы был юналештә бик ҙур уңыштарға өлгәште. 1947 йыл — һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың икенсе йылы — СССР-ҙың экономик үҫеш темптарын кискен рәүештә күтәреү йылы булды. Был йылдың планы арттырылып үтәлде. Йыл эсендә промышленность продукцияһы етештереп сығарыу 22 процентҡа артты. Промышленность производствоһы 1940 йылдың уртаса квартал кимәленә барып етте. 1946 йыл менән сағыштырғанда хеҙмәт етештереүсәнлеге 13 процентҡа үҫте.

Беҙҙең совет халыҡ хужалығыбыҙ 1948 йылдың беренсе кварталында тағы ла яҡшыраҡ еңеүҙәргә өлгәште. СССР Госпланының беҙҙең матбуғатыбыҙҙа 15 апрелдә иғлан ителгән белдереүе был турала бик асыҡ дөрөҫлай. Биш йыллыҡтың эсенсе хәл иткес йылының өс айы промышленностең ҙур үҫеше, ауыл хужалығын артабан нығытыуы һәм совет халҡтары көн-күрешенең байтаҡ яҡшырыуы менән билдәләнде.

Беҙҙең промышленносебеҙҙең алға барыу темптары йылдан-йылға, кварталдан-кварталға үҫә. Ҡара металлургия, күмер промышленносе, электр промышленносе кеүек промышленностең мөһим тармаҡтары квартал планын арттырып үтәнеләр. Беҙҙең промышленносебеҙ, үткән йылдың беренсе кварталында биргәнгә ҡарағанда, 1948 йылдың беренсе кварталында суйынды 36 процентҡа, ҡоросто — 41 процентҡа, прокатты — 43 процентҡа, күмерҙе — 20 процентҡа, нефтте 24 процентҡа күберәк бирҙе. Тракторҙар һәм ауыл хужалығы машиналары эшләп сығарыу ике тапҡырҙан күберәккә артты, ә бөтә промышленностең валовой продукцияһы, 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, 32 процентҡа үҫте.

Тимер юл һәм диңгеҙ транспортында йөк әйләнеше байтаҡ артты. Капиталь эштәр йылдам темптар менән үҫә. 1948 йылдың I кварталында уның күләме, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 119 процент тәшкил итте. Төҙөлөш ойошмалары аҡса һәм материаль ресурсҙарҙы мөһим төҙөлөштәргә туплау турағында хөкүмәттең күрһәтмәләрен тормошҡа ашырыу өсөн көрәшәләр. Халыҡҡа аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары һатыу байтаҡ артты. 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда улар: икмәк буйынса 72 процентҡа, шәкәр буйынса — 170 процентҡа артты һәм башҡалар. 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, колхоз баҙарында тауар хаҡтары өс тапҡырҙан артығыраҡҡа кәмене. 1948 йылдың II кварталының тәүге көндәре государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын кәметеүҙең яңы этабы менән билдәләнде, ҡайһы бер промышленность һәм аҙыҡ-түлек тауарҙарына хаҡтарҙы кәметеү тураһында хөкүмәт ҡарары был турала асыҡ һөйләп тора. Быларҙың бөтәһе I кварталда һумдың һатып алыу һәләтлеген 41 процентҡа күтәреүҙе тәьмин итте. Был, шулай уҡ, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль эш хаҡтарын уртаса 51 процентҡа арттырыуға килтерҙе.

Шулай уҡ аҙыҡ-түлеккә һәм промышленность тауарҙарына карточкаларҙы бөтөрөү һәм аҡса реформаһын үткәреү илдең хужалыҡ үҫешендә һәм СССР хеҙмәтсәндәренең материаль хәлен яҡшыртыуҙа бик ҙур роль уйнаны. Тик государствоның ваҡлап һатыу хаҡтарын кәметеүҙән генә лә 1948 йылда халыҡ 57 миллиард һумдан артығыраҡ саф файҙа ала.

Халыҡ хужалығының үҫеүе нигеҙендә үткән ике йылда эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һаны 4,2 миллион кешегә артты. 1947 йылда эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең эш хаҡы фонды, 1946 йылға сағыштырғанда, 23 процентҡа үҫте.

Хеҙмәт етештереүсәнлегенең йылдам күтәрелеүе 1948 йылдың тәүге айҙарының айырыуса күренекле уңышы булып тора. Промышленностә эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге, 1947 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 21 процентҡа үҫте. Был хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫешенең темпы, үткән йылға ҡарағанда, бер ярым тапҡырға юғарыраҡ тигән һүҙ. Совет кешеләре бында законлы ғорурлыҡ менән совет общество ҡоролошоноң бөйөк өҫтөнлөгөнөң яңы раҫланыуын күрәләр.

«Коммунистар партияһының етәкселегендә, — тине иптәш Сталин, — совет кешеләре яңы биш йыллыҡты үтәү генә түгел, хатта арттырып үтәү өсөн дә көстәрен һәм хеҙмәттәрен йәлләмәҫтәр тип ышанырға мөмкин». Иптәш Сталиндың һүҙҙәре тормошҡа ашырыла. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн бөтә шарттар тыуҙырылды. 1948 йылдың планын үтәү был тарихи бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн хәл иткес әһәмиәткә эйә булып тора.

1948 йылда ауыр индустрияны һәм, бөтәһенән элек, металлургия, күмер һәм нефть промышленносен тағы ла тиҙерәк алға ебәреү айырыуса мөһим.

Быйыл капитал төҙөлөштөң грандиоз программаһы тормошҡа ашырылырға тейеш. Был маҡсат менән бөтә материаль һәм финанс ресурстары һәм эшсе көсө 1948 йылда хәрәкәткә индереләсәк хәл иткес төҙөлөштәргә туплана.

Хеҙмәт процестарын механизациялау беҙҙең темптарыбыҙҙа хәҙер беренсе дәрәжәләге әһәмиәткә эйә булып әүерелә. Күмер, ҡара металлургия һәм урман промышленностәрендә, төҙөлөштә һәм транспортта күп көс талап иткән ауыр хеҙмәт процестарын механизациялауға айырыуса ҙур иғтибар бирергә кәрәк.

Беҙҙең социалистик ауыл хужалығыбыҙ ҙур бурыстарҙы хәл итә. Большевиктар партияһының етәкселегендә совет крәҫтиәндәре ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы тарафынан билдәләнгән һуғыштан һуңғы ауыл хужалығын күтәреү программаһын үтәү өсөн фидаҡәр рәүештә көрәшәләр. Һәм был өлкәлә улар күп кенә уңыштарға өлгәштеләр. Совет ауыл хужалығы һуғышҡа тиклемге иң яҡшы йылдарҙа государствоға нисә тиклем иген биргән булһа, 1947 йылда шул тиклем иген бирҙе. Ауыл хужалығының валовой продукцияһы, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 32 процентҡа, бөртөклө культуралар — 58, шәкәр сөгөлдөрө— 190, көнбағыш — 79 процентҡа үҫте.

Социалистик промышленностең һәм ауыл хужалығының уңыштары 1948 йылда тағы ла юғарыраҡ урожай алырға ыңғай шарттар тыуҙыра. 1947 йылдың көҙөндә колхоздарҙа, үткән йылға ҡарағанда, ужым 3,5 миллион гектарға артығыраҡ сәселде, 8 миллион гектарға артығыраҡ туңға һөрөлдө. Государство МТС-тарға, совхоздарға һәм колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтә. Быйыл совет ауылы 68 мең яңы трактор, 25 мең комбайн, 60 мең йөк автомобиле, 67 мең трактор сәскестәре, бик күп һанда ауыл хужалығы машиналары һәм 3 миллион тоннанан артығыраҡ ашламалар аласаҡ.

1948 йылда колхоздар, үткән йыл менән сағыштырғанда, сәсеү майҙанын 15,6 процентҡа, ә яҙғы бойҙай сәсеүҙе 35 процентҡа арттырырға тейештәр, шәкәр сөгөлдөрө, картуф һәм йәшелсә сәсеүлектәре буйынса һуғышҡа тиклемге кимәлде уҙып китергә һәм бөтә культураларҙың урожайлылығының яңы үҫешен тәьмин итергә кәрәк. 1948 йылға шулай уҡ малсылыҡты үҫтереүҙең юғары темптары билдәләнгән.

Хеҙмәтсәндәр массаһының иң киң ҡатламының быға тиклем күрелмәгән производство күтәрелеше, большевиктар партияһы тарафынан етәкселек ителгән күтәрелеш социалистик төҙөлөш фронтында беҙҙең бөйөк еңеүҙәребеҙҙең нигеҙе булып тора. Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярыш быға тиклем күрелмәгән киң күләм алды һәм ысын мәғәнәһендә бөтә халыҡ ярышы булып әүерелде. Йөҙ меңләгән эшселәр 2—3 йыллыҡ нормаларын үтәйҙәр. Йөҙ меңләгән колхозсылар 1947 йылда урожайлылыҡ пландарын арттырып үтәнеләр.

Совет государствоһы беҙҙең кешеләребеҙҙең хеҙмәт подвигтарын юғары баһалай. Ауыл хужалығының йөҙләгән алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, ураҙаған мең колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктары Советтар Союзының орденлары һәм миҙалдары менән наградландылар. Республикаларҙың, крайҙарҙың, өлкәләрҙең һәм промышленность тармаҡтарының хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең иптәш Сталинға яҙған хаттарында яуаплы йөкләмәләр алдылар. Улар юлбашсыға бирелгән һүҙҙә аҡларға ынтылып, яңынан-яңы уңыштарға өлгәштеләр. Беренсе Май алдынан йөҙәләребеҙҙән ярыш бик күп гүзәл хеҙмәт подвигтары менән билдәләнде.

Социалистик ярыштың пландың һан яғынан үтәү генә түгел, шулай уҡ сифат күрһәткестәрен яҡшыртыу өсөн көрәшкә лә йүнәлдерелгән булыуы ярыштың хәҙерге этабының характерлы үҙенсәлеге булып тора. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүгә өлгәшеү, файҙаланылмаған яңы резервтарҙы һәм ресурстарҙы табыу — иң мөһим бурыс бына шул. Оборудованиеларҙы, материалдарҙы, сырьены файҙаланыуҙа уртача прогрессив нормаларҙы индереү өсөн, тотош ағылыш производство методтарын, яңы техниканы һәм алдынғы технологияны индереү өсөн, идара итеүҙә артыҡ расходтарҙы бөтөрөү өсөн һәм предприятиеларҙың рентабеллелеге өсөн ныҡышмалы көрәш алып барырға кәрәк. Бының нисек тиклем мөһим икәнлеге шунан күренә, 1947 йылда промышленность продукцияһының үҙенә төшөү хаҡын ни бары 1 процентҡа ғына кәметеү 1,8 миллиард һум тәшкил итте.

Совет Тыуған иленең ҡеүәтен нығытыу һәм беҙҙең илдә коммунизмдың тантанаһы хаҡына үҙ-үҙҙәрен аямай эшләүҙә совет кешеләренең үҫә барған социалистик аңлылыҡтары, социалистик общество ҡоролошо вәкилдәре булыу яғынан уларҙың рухани өҫтөнлөктәре асыҡ күренә.

Партия һәм Совет государствоһы хеҙмәтсәндәрҙең политик-ағартыу һәм культура кимәлдәрен күтәреү буйынса ғәйәт ҙур эш алып бара. Совет илендә мәктәптәрҙә 30 миллионға яҡын бала, юғары уҡыу йорттарында һәм техникумдарҙа — 1.670 мең кеше уҡый. Был бөтә Европа илдәрендәгегә ҡарағанда, бер нисә тапҡырға күберәк тигән һүҙ. Политик һәм фәнни белемдәрҙе пропагандалау киң рәүештә алып барыла. Культура-ағартыу учреждениеларының, театрҙарҙың, филармонияларҙың, культура йорттарының, уҡыу өйҙәренең, библиотекаларҙың һәм башҡаларҙың ҙур селтәре йәйелдерелгән.

Бер генә капиталистик государство ла мәғариф эшенең бындай ҡоласын белмәй. Демократияһы һәм культураһы доллар ясмалары тарафынан маҡталған АҠШ-та 10 миллион грамотаһыҙ һәм 20 миллион аҙ грамоталы кеше иҫәпләнә.

Партия һәм Совет государствоһы фәнде һәм техниканы үҫтереү өсөн айырыуса уңайлы шарттар тыуҙыралар. Советтар Союзында СССР Фәндәр Академияһы һәм уның 272 институты, Союзлы республикаларҙың 11 фәндәр академияһы, тармаҡлы 900 фәнни-тикшеренеү институты киң күләмдә эш алып баралар. Беҙҙә 100 меңдән артығыраҡ иҫәпләнгән фән кешеләре иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған бөйөк бурысты—сит илдәрҙәге фән өлгәшеүҙәрен уҙып китеү, совет техникаһын үҫтереү эшен алға хәрәкәт иттереү, хеҙмәт етештереүсәнлеген һәм баҫыуҙарҙың урожайлылығын күтәреүҙең яңы юлдарын асыу бурысын хәл итеү өсөн фидаҡәр эшләйҙәр.

Партия һәм хөкүмәт кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы киҫкен көрәш алып баралар һәм беҙҙең халҡыбыҙҙы коммунистик аңлылыҡ рухында тәрбиәләйҙәр. Улар беҙҙең кешеләребеҙҙә совет патриотизмы тәрбиәһен, үҙенең бөйөк социалистик Ватанына булған ғорурлыҡ тойғоһон күтәрәләр. Улар беҙҙең интеллигенцияның әле ҡайһы бер өлөшө араһында булған көнбайыш буржуаз культураһы алдында баш эйеү һәм тәләнеү факттарын фаш итәләр. Партия һәм Совет государствоһы большевистик партиялылыҡ байрағын, буржуаз идеологияның йоғонтоһона ҡаршы килешмәүсән көрәш байрағын юғары тоталар.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеология мәсьәләләре буйынса тарихи ҡарарҙары беҙҙең идеологик эштәребеҙҙең бөтә участкаларында ла ҙур йәнләнеш тыуҙырҙы. Һуңғы ваҡытта совет кешеһенең юғары мораль йөҙөн, общество һәм государство ҡоролошобоҙҙоң өҫтөнлөгөн, илебеҙҙә бөйөк үҙгәртеп ҡороуҙарҙа партияның ролен күрһәтеүсе күп кенә яҡшы художестволы әҫәрҙәр булдырылды.

Яҙыусылар, композиторҙар, художниктар, театр коллективтары буржуаз-формалистик йоғонтоно тамырынан бөтөрөргә һәм социалистик реализм методына тулыһынса эйә булырға тейештәр. Уларҙың үҙ халҡы алдындағы бурысы — социализм эпохаһына лайыҡлы булған, йөкмәткеле, тәрән идеялы һәм юғары художестволы әҫәрҙәр тыуҙырыуҙан тора.

Коммунизмде артабан төҙөү интерестарында беҙ үҙебеҙҙең эшебеҙҙең бөтә участкаларындағы етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу асырға һәм уларҙы киҫкен рәүештә бөтөрөргә тейешбеҙ. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләү коммунизм төҙөү өсөн көрәштә ҡеүәтле инструмент булып тора. Ул яңыны нығытыуға һәм иҫкене бөтөрөүгә ярҙам итә. Тәнҡитте һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе ҡыйыуыраҡ һәм киңерәк йәйелдерергә! Беҙҙең обществоның экономик һәм культура үҫешен тиҙләтеү юлдарының береһе ошонда тора.

Илебеҙҙә социализм төҙөлөшөн киң йәйелдерә барып, Советтар Союзы халыҡ-ара аренала тыныслыҡ политикаһын ныҡлы һәм киҫкен рәүештә тормошҡа ашыра. Совет Хөкүмәтенең тышҡы политикаһы халыҡтарҙың азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ эшен нығытыуға һәм халыҡтар араһында оҙаҡ һәм ныҡлы тыныслыҡ тәьмин итеүгә йүнәлтелгән.

СССР Германияның элекке союзниктары менән ярашыу договорҙары буйынса булған үҙ йөкләмәләрен анығ үтәй. Германияның совет оккупацияһы зонаһында совет власттары ысын демократиялаштырыу һәм демилитаризациялаштырыу эшен үткәрәләр. СССР Германия менән ярашыу договоры тураһындағы мәсьәлә буйынса союзниктар менән килешеп эшләнгән ҡарарҙарға өлгәшергә тырыша.

Венгрия, Румыния һәм Болгария менән ярашыу договорҙары шарттарының Советтар Союзы тарафынан анығ үтәлеүе был илдәрҙә фашизм ҡалдыҡтарын ысын мәғәнәһендә бөтөрөүҙе, ул илдәрҙең ысын азат ителеүен, демократик реформалар үткәреүҙе һәм хужалыҡты ялҡҡа баҫтырыу бурыстарын уңышлы хәл итеүҙе тәьмин итте.

СССР үҙенең тышҡы политикаһын ҙур һәм бәләкәй халыҡтарҙың милли суверенитетын тулы хөрмәтләү принциптарында төҙөй. Советтар Союзы һуңғы йылдар эсендә күп илдәр менән сауҙа договорҙары һәм экономик килешеүҙәр төҙөнө.

Тыныслыҡ һөйөүсе государстволар араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙамлашыу турҙағындағы договорҙар системаһы имнселекте нығытыу өсөн ҙур әһәмиәткә эйә. СССР Тымыҡ Боҙ океанынан алып Ҡара диңгеҙгә тиклем — үҙенең көнбайыш сигендәге бөтә государстволар менән ошондай договорҙар төҙөнө, был Европаның үҙәгендә һәм көньяҡ-көнсығышында тыныслыҡ эшен серьез рәүештә нығытты.

Советтар Союзы тыныслыҡ өсөн көрәште үҙенең маҡсаты итеп ҡуйыусы бөтә халыҡ-ара ойошмаларҙы яҡлай. Совет дипломатияһы Берләшкән милләттәр ойошмаһын халыҡ-ара реакция ҡоралына әйләндерергә маташыуҙарҙы фаш итә һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһын тыныслыҡ интерестарында файҙаланыу өсөн көрәшә. Совет делегацияһының тәҡдиме буйынса Берләшкән милләттәр ойошмаһы ҡоралланыуҙы дөйөм ҡыҫҡартыу һәм регулировать итеү тураһында, яңы һуғыш уты тоҡандырыусыларҙы хөкөм итеү, тыныслыҡ эшен нығыта торған башҡа ҡарарҙар тураһында ҡарар ҡабул итте.

СССР үҙенең башҡа халыҡтар менән мөнәсәбәттәрендә төрлө социаль-экономик системаларҙың тыныс йәшәй алыу мөмкинлеген сығып эш итә һәм шуға күрә халыҡ-ара хеҙмәттәшлек принциптарын һаҡлауға тайпылышһыҙ ынтыла.

Совет дипломатияһының Германия, Австрия, Корея мәсьәләләре, Италия колониялары тураһындағы кеүек мәсьәләләр буйынса килешелгән ҡарарға килеү өсөн арымай-талмай тырышлыҡ итеүе — былар бөтәһе лә СССР-ҙың яңы һуғышты булдырмау һәм дөйөм имнселекте нығытыу маҡсаттарында бөтә государстволар менән дә хеҙмәттәшлек итеү өсөн ныҡлы тырышлығын күрһәтәләр.

Совет иленең авторитетын кәметергә теләп, АҠШ-тың һәм Англияның реакцион круттары үҙ пропагандаларында СССР-ҙың бөтә политикаһын ялған рәүештә күрһәтергә, айырым алғанда уның гитлерсы ордаларға ҡаршы көрәшендәге бөйөк ролен шик аҫтына ҡуйырға маташалар. Герман архивынан алынып АҠШ-та иғлан ителгән документтар тап ошо маҡсатты тоталар.

СССР Сит ил Эштәре Министрствоһы тарафынан күптән түгел иғлан ителгән документтар Англияның һәм Францияның исек итеп гитлерсе клиҡаны был еңәйәтсел һуғышҡа рухландырыуҙы һәм хатта Германияның хәрби потенциалын яңынан тыуҙырыу өсөн финансировать итеүҙәрен күрһәттеләр.

Совет государствоһы үҙенең экономик һәм политик ҡеүәтенә, совет халҡының мораль-политик берҙәмлегенә, уның большевистик партия тирәһенә тупланыуына таянып, халыҡ-ара политикала үҙенең изге маҡсаттарын ышаныслы рәүештә тормошҡа ашыра. Бөйөк аҡыллылыҡ, түҙемлелек, ныҡлылыҡ, әҙмә-әҙлелек — советтең сталинса тышҡы политикаһы бына нәмә менән айырыла. Тыныслыҡтың һәм демократияның терәге булған социалистик государствоның артабан нығытыу—халыҡ-ара демократик лагерҙең реакцияның бөтә һәм һәр төрлө әҙләнеүҙәренә ҡаршы уңышлы көрәшендә төп шарт булып тора.

Халыҡ демократияһы илдәре демократик лагерҙең мөһим көсө булып тора, һуңғы йылда улар тормоштоң бөтә тармаҡтарында ла ҙур өлгәшеүҙәргә ирештеләр. Был илдәрҙә бөтә эске демократик көстәрҙең туплана барыуы беренсе дәрәжәләге әһәмиәткә эйә. Хеҙмәтсәндәр берҙәмлегенең үҫеүе Польшала, Чехословакияла, Югославияла, Болгарияла, Венгрияла, Румынияла, Албанияла яңы демократия режимының экономик һәм политик нығыуын тәьмин итте.

Көнбайыш Европа государстволарынан яңы демократия илдәре промышленность производство кимәле буйынса һуғышҡа тиклем кимәлгә йәки иңде етеүҙәре, йәки бөтөнләй яҡынлашыуҙары менән айырылалар. Халыҡ массаларының үҫә барған политик активлеге арҡаһында реакцион круттарҙың был илдәрҙең үҫешен кире артҡа боророрға, уларҙы яңынан империалистик государстволарҙың колонияларына итергә маташыуҙары өҙөлдө. Яңы демократия халыҡтары Маниу, Петков, Миколайчик, Надь Ференц һәм башҡалар кеүек һатлыҡ йәндәрҙе һәм заговорсыларҙы бер ҡуйылдан фашланылар һәм хөкөм иттеләр.

Уң социалистарҙың был илдәрҙәге эшсе синыфын тарҡатыуға иҫәп тотоуҙары емерелеүгә осраны. Эшселәр синыфының айырым отрядтарын берҙәм эшсе партияға берләштереү эшен әҙерге ынтылыусы лейборист эмиссарҙарҙың эшмәкәрлек итеүҙәренә ҡарамаҫтан, Румынияла инде социал-демократик һәм коммунистик партиялар бергә ҡушылдылар. Венгрияла, Болгарияла, Польшала һәм Чехословакияла эшсе партияларҙы берләштереү тураһында ҡарар ҡабул ителде.

Был тәбиғи процесс, сөнки эшселәр синыфы сафтарын тарҡатыу буржуазия өсөн кәрәк ине. Халыҡ демократияһы илдәре социалистик үҫеш юлына баҫып, халыҡ массаларының тығыҙ тупланыуы өсөн шарттар тыуҙырҙылар.

Коммунистик партияларҙың гитлерселәргә ҡаршы көрәштә һәм тыныс ижади эштә юғары авторитет яулап алыуҙары партияларҙы берләштереү тураһындағы һөйләшеүҙәрҙең уңышлы барыуына ярҙам итте. Эшсе синыфының алдынғы партияһы булыу яғынан компартиялар үҙ тирәләренә халыҡ массаларын берләштерәләр һәм Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европа илдәренең демократик үҫешендә етәксе ролдә уйнайҙар. Улар — иң массовый партиялар. Югославия компартияһы үҙ сафтарында 400 меңдән артыҡ член иҫәпләй, Болгария компартияһында — 500 мең, Польша компартияһында — 800 мең, Чехословакия компартияһында — 1,5 миллион самаһы член бар. Компартиялар етәкселегендә Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европа хеҙмәтсәндәре социализм юлынан уңышлы алға барыу өсөн кәрәкле шарттарҙы тыуҙырҙылар.

Көнбайыш Европа илдәре серьез экономик ҡыйынлыҡтар кисерәләр. Экономик ҡыйынлыҡтарҙа байыусы монополистарҙың ҡомһоҙлоҡ интерестары һуғыштан һуңғы бөлгөнлөктәрҙе һәм емереклектәрҙе бөтөрөүгә ҡамасаулайҙар. Промышленностең мөһим тармаҡтары емерелеү хәленә киләләр. Машиналарҙы яңыртыуға, сырьё һәм аҙыҡ-түлек һатып алыуға средстволар юҡ. Халыҡ өсөн продукцияларҙы һәм тауарҙарҙы ҡаты нормалаштырыу кәсәйә. Эшселәрҙең реаль эш хаҡы хәҙерге ваҡытта һуғышҡа тиклемгенең тик яртыһын ғына тәшкил итә. Шуның менән бергә, монополистарҙың табыштары тайпылышһыҙ үҫәләр. Халыҡ массалары һәм бөтә прогрессив деятелдәр тик тәрән демократик реформалар үткәргәндә генә был йәшәп килгән хәлдән сығыу мөмкинлеген күрәләр.

Демократик көстәрҙең үҫешенән һәм халыҡ демократияларының уңыштарынан ҡурҡынған Европа реакцион круттары ауыр хәлдән сығыу мөмкинлектәрен Америка кредиттарын алыуҙа, Европаға ҡоллоҡ килтереүсе «Маршалл планы»нан эҙләйҙәр.

Халыҡ массалары коммунистарҙың бер-ҙән-бер дөрөҫ юл алып барғанлыҡтарына барған һайын күберәк ышаналар. Үҙ сафтарында миллион самаһы члены булған француз компартияһы илдә иң ҙур партия булып тора. Ул эшселәр синыфын, хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙе демократик Францияны ҡайтанан булдырыу өсөн, Америка тарафынан ҡоллоҡҡа төшөрөүгә ҡаршы көрәшкә туплай. Англияла шулай уҡ коммунистарҙың авторитеты үҫә. Күптән түгел булып үткән завод комитеттарына цех старосталарын һайлауҙарҙа коммунист кандидаттар серьез еңеүгә өлгәштеләр. Ҙур профсоюз ойошмалары государство учреждениеларынан коммунистарҙы таҙартыуға ҡаршы сығалар һәм был таҙартыу сараһын илдең конституцион азатлыҡтарына ҡаршы реакцион ҡалҡыу итеп ҡарайҙар.

Италияла реакция көстәре менән демократия көстәре араһындағы көрәш бик ҙур көсөргәнешкә барып етте. Урта диңгеҙ империалистәрҙең ҙур уйының аренаһы булып баҫты. Италия бында мөһим позицияларҙы тота. Халыҡ демократияһы илдәре менән Италияның күрше булыуы, ул Греция кеүек уҡ Америка агрессив круттарының айырым иғтибарын йәлеп итте.

Һайлау көрәше средстволары сифатында Американан алынған аҙыҡ поставкаларыла, аслыҡ менән ҡурҡытыуҙа, ҡоралды көстәрҙең ерҙә, һыу өҫтөндә, һауала үткәрелгән асыҡ демонстрацияларын да файҙаландылар. Ватиканың миллион ярым кешенән торған ҡара армияһы ла сығып яуаны. Радио һәм матбуғат, Американан килгән пропагандистик хаттар — былар бөтәһе лә халыҡ демократияһы фронты позицияларына ҡаршы йүнәлтелгәйнә.

18 һәм 19 апрелдә булған тауыш биреүҙең йомғаҡтары халыҡ демократияһы фронтын изоляциялау буйынса, реакцион пландың емерелеүе тураһында һөйләйҙәр.

«Халыҡ фронты,—тип яҙа Италия газетаһы «Унита»,—бөтә илдә ҙур политик яҡлауҙы алды. Һайлауҙарҙа депутаттар палатаһына 8 миллион һәм сенатҡа 6,9 миллион тауыш йыйылыуы уның ҡеүәтле көсө тураһында һөйләй. «Был көс, — «Аванти» газетаһы яҙыуынса,—иң ҡот осҡос ҡыҫым алдында, хатта халыҡ берҙәмлеген асыҡтан-асыҡ емереү маҡсаты менән демократия дошмандары тарафынан уға ҡоралы ҡыҫым яһауҙары алдында ла тайшынмай һәм сигенмәй».

Грецияның хеҙмәтсән халҡы үҙенең бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшә. Ҡытай халҡы, ҡулына ҡорал тотоп, үҙенең азатлығын яҡлай. Был көрәш бөтә прогрессив кешелектең ҡайнар симпатияһы менән солғап алынған.

Бөтә донъяла демократия көстәре үҫәләр. Империалистар үҙҙәренең халыҡҡа ҡаршы үҫал политикаларын тик эшселәр хәрәкәте эсендәге үҙ агентуралары — пролетариаттың көстәрен йомшартыусы социалистар булышлығы менән генә үткәрә алалар. Ләкин эшселәр синыфының үҙ сафтарын берләштереүгә ынтылышы бик ҙур. Уң социалистар үҙ йоғонтоларын юғалталар. Италия эшселәре раскольник-сарагатсылар артынан китмәнеләр. Леон Жуо һәм уның агенттәре Францияла профсоюздар хәрәкәтен тарҡата алманылар. Франция социалистик партияһында һул социалистарҙың «Батай социалист» тигән ойошмаһы байтаҡ урын тота.

Буржуаз государстволарҙа демократик көстәрҙең үҫеүе — тыныслыҡты яҡлау эшендә иң мөһим фактор булып тора.

Коммунистик партиялар тирәһенә тупланған хеҙмәтсәндәрҙең сафтары донъяның барлыҡ өлөштәрендә киңәйә. Бөтә донъяла азатлыҡ, тыныслыҡ һәм демократия өсөн көрәшеүсе бөйөк Советтар Союзына халыҡтарҙың симпатияһы артҡандан-арта бара.

Демократияның һәм социализмдың көстәре бик ҙур. Әгәр ҙә улар көрәштә ныҡлыҡ һәм батырлыҡ күрһәтһәләр, үҙ сафында агрессияның бер ниндәй ҙә пландары тормошҡа ашырыла алмаҫ. Антиимпериалистик, демократик лагерҙең маҡсаттары халыҡтарҙың ысын интерестарына һәм общественный үҫештең өлгөргән еткән талаптарына яуап бирәләр. «Беҙ бөтә юлдар коммунизмға алып барған быуатта йәшәйбеҙ». (В. М. Молотов).

Коммунизм — ул кешелектең иң яҡшы идеалдарын эсенә ала. Коммунизмдың беренсе фазаһын тормошҡа ашырған Советтар Союзы бөтә донъя хеҙмәтсәндәре өсөн юл күрһәтеүсе йондоҙ булып тора.

Совет кешеләре үҙҙәренең бөйөк тарихи миссияларын аңлайҙар. Улар бөтә донъя-тарихи әһәмиәтле бурыстарҙы хәл итәләр. Улар был бурыстарҙы үтәү өсөн совет гражданының, коммунизм төҙөүсе кешенең намыҫын һәм достоинствоһын юғары тотоу кәрәклеген беләләр.

Фидаҡәр хеҙмәт итеү, юғары государство дисциплинаһы, коммунистик аңлылыҡ совет халҡының тарихи миссияһын үтәүҙә иң беренсе шарт булып тора. Совет халҡы, бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре кеүек үк, Беренсе Май көнөнә үҙ көсөнә смотр яһау ғына түгел, бәлки быға тиклем хәл ителмәгән яңы бурыстарҙы үтәү өсөн үҙенең көстәрен мобилизациялай.

Совет халҡы большевиктар партияһы етәкселегендә һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн, тулы коммунистик общество төҙөү өсөн көрәшә. Коммунизмдың Советтар Союзында тапалған нурлы яҡтыһы кешелек донъяһына ел быуынға йыуыштырып ...ды, бәхетле тормош ҡороу өсөн уның бөйөк көрәшенең юлын яҡтырта.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

МТС коммунистәре юғары урожай өсөн көрәшәләр

Ерекле машина-трактор станцияһының партия ойошмаһы Шаран районындағы иң ҙур ойошмаларҙан һанала. Унда 30 коммунист учетта тора.

МТС коллективе үҙған ауыл хужалығы йылын уңышлы ғына тамамланы. Район Советы депутаты коммунист тракторист иптәш Усманов, план буйынса 1100 гектар урынына, 2227 гектар ер эшкәртеп, районда беренселекте алды. Комсомолка-трактористка Павлова Прасковья йыллыҡ заданиеһын 120 процентҡа үтәне. Ул эшкәрткән ерҙәрҙән һәр гектарынан 15—16-шар центнер урожай алынды.

МТС-тың мөмкинлектәренә ҡарағанда, әлбиттә, тағы ла яҡшыраҡ, һөҙөмтәлерәк эшләргә булыр ине.

Отчет-һайлау йыйылышында коммунистар быны аңлап, МТС-тың эшен тағы ла яҡшыртыу өсөн көрәштә үҙ алдарына ҙур бурыстар ҡуйҙылар һәм практик эшкә башланылар. Партия ойошмаһының яңы һайланған секретаре Рәшитов һәм МТС директорының политик эш буйынса урынбаҫары Ибраһимов иптәштәр эште коммунистарҙың производствола авангардлыҡ ролдәрен күтәреүҙән башлап ебәрҙеләр.

Декабрь, ғинуар айҙарында мастерскойҙа һәм гараждарҙа иртә таңдан алып, киске сәғәт туғыҙға тиклем эш ҡайнаны. Дүрт ремонт бригадаһы бер-береһе менән ярышып эшләне. Көндәлек эш нормаларының үтәлеше һәр көн кис күрһәткес таҡтаһында сағылдырылды. Алдынғы бригадирҙарҙың һәм ремонтсыларҙың фамилиялары ун көн һайын почет таҡтаһына яҙылып барылды. Дөрөҫ ойошторолған ярыш үҙенең гүзәл емештәрен бирҙе. Коммунист токарь Сафонов көндәлек нормаһын 225—250 проценттан кәм үтәмәне. Заводта эшләнә торған фланс, плунжир һәм вентилятор подшипниктәрен ул үҙе яһаны. Ҡыҙыу эш ваҡытында ул Латипов Миңнеханы токарлек профессияһына өйрәтте.

Һәр бер сәғәтте нығлы иҫәпкә алып эш күргән Густов бригадаһы ярышта еңеп сыҡты. Уның артынан Усманов бригадаһы һуңғы тракторҙы стройға индерҙе.

Коммунистар етәкселек иткән бөтә бригадалар ҙа ремонт эштәрен тамамланылар.

Ремонт эшселәре араһында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, социалистик ярышта алған йөкләмәне намыҫ менән үтәү ремонт эштәрен срогынан ай ярым алда тамамларға мөмкинлек бирҙе. «Көрәс аттарға» үткәрелгән һынау ремонттың сифаты яҡшы булыуын күрһәтте.

Алтай колхозсыларының быйыл тағы ла юғары урожай алырға һүҙ биреп иптәш Сталинға яҙған хаттары МТС эшселәре коллективын фидакәр хеҙмәткә дәртләндерҙе. Бер үк ваҡытта комбайн моторҙарын ремонтлау эше алып барылды. Коммунист—механик Басиров ремонт эше менән оҫта етәкселек итте. Бер генә эшсе лә буш торманы. Бер генә деталде лә көтөп торорға, эҙләп йөрөргә тура килмәне.

Коммунистарҙан Хөснөтдинов һәм Фәйрушин иптәштәрҙең бригадалары комбайн моторҙарын ремонтлау эшен тамамлау алдында торалар. Улар ошо көндәрҙә һуңғы моторҙы ремонттан сығарасаҡтар.

МТС быйыл 12 яңы трактор аласаҡ. Шуларҙың алтыһы көсле «дизелдәр». Машина-трактор станцияһының дирекцияһы быны иҫкә алып, өҫтәмә кадрҙар әҙерләү өсөн бер айлыҡ курс ойошторҙо.

Партия йомшаһы ҡыҙыу эш ваҡытында ла политик уҡыуҙарҙы туҡтатманы. Коммунист ниндәй шарттарҙа ғына булһа ла, үҙенең политик белемен күтәреү өҫтөндә эшләргә бурыслы. Быны Ерекле МТС-ы коммунистәре хәтерҙәренән сығармайҙар.

МТС-та политик мәктәп һәм политик түңәрәк эшләй. 10 коммунист ВКП(б) тарихен үҙ алдына өйрәнә. Иптәш Ибраһимов етәкселек иткән түңәрәктә 13 коммунист уҡый. Улар менән инде 12 занятие үткәрелде.

Ремонт эштәрендә беренселекте алған слесарь иптәш Ҡадиров һәм шофер Миңнуллин иптәштәр уҡыуҙа ла алда баралар. Улар үтелгән материалды «яҡшы» һәм «отличноға» үҙләштерәләр. Байбаков иптәш етәкселек иткән политик мәктәптә 7 коммунист уҡый. Улар хәҙер «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсының» VI главаһын өйрәнәләр. Хәйретдинов, Суфиянов иптәштәр айырыуса тырышып уҡыйҙар һәм дәресҡә яҡшы әҙерлек менән киләләр.

Партия ойошмаһы йәш коммунистарҙы тәрбиәләүгә ныҡ иғтибар бирә. МТС директоры Сәхибгәрәев улар менән ВКП(б) Уставын, Иосиф Виссарионович Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса занятиелар үткәрә.

Һәр коммунистең көсөнә ҡарап партия поручениеһе бирелгән. Стахановсы иптәш Басиров мастерской эшселәре араһында агитатор булып эшләй, иптәш Хәйруллин—стена газетаһының редакторы. Газета ваҡытында сығарыла, унда алдынғыларҙың эш тәжрибәләре яҡтыртыла, яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлектәге етешһеҙлектәр тәнҡитләнә.

Ерекле МТС-ы коммунистәре яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылын бына ошондай әҙерлектәр менән ҡаршылайҙар.

И. Абдуллин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Ҡыйғыла артель Уставын боҙоусыларға килешеп ҡарайҙар

Ҡыйғы районының партия, совет ойошмалары, колхоз етәкселәре ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы аҙағына тиклем бөтөрөү, айырым ойошмалар һәм кешеләр тарафынан колхоздарҙан законһыҙ алынған малдарҙы, средстволарҙы колхоздарға ҡайтарып биреү өсөн ныҡлы көрәш алып барыһы урынына, һуңғы айҙарҙа был өлкәлә эште бөтөнләй йомшарттылар.

Район Советы исполкомы колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоусыларға килешеп ҡарауҙа дауам итә. Ошо йылдың өс айы эсендә был мәсьәлә буйынса исполком ултырышында бер генә ауыл Советы һәм колхоз председателенең дә отчеты тыңланмауы осраҡлы хәл түгел, әлбиттә. Ғинуар айында булып үткән район Советы исполкомы сессияһында был турала мәсьәлә ҡуйылырға тейеш булһа ла, материалдар алдан әҙерләнмәгәнлектән, ул көн тәртибенән төшөрөп ҡалдырылды. Район Советы исполкомы хатта үҙе лә Буденный исемендәге колхоздан алған 22 центнер һолоно ошо көнгә тиклем колхозға ҡайтарып биргәне юҡ.

Район Советы исполкомы тарафынан контролдең булмауынан файҙаланып, айырым ойошмалар һәм кешеләр колхоздарҙан законһыҙ алған байлыҡтарҙы ҡайтарыуҙы йылдар буйына һуҙып киләләр. Мәҫәлән, Ибрай ауыл Советы председателе Зөлҡәрнәев — «Красная заря» колхозынан, Государство иммиселеге Министерствоһының район бүлеге — «Память Ильича» колхозынан, Эске Эштәр Министерствоһының район бүлеге — «Красный Урал» колхозынан алған аттарҙы бөгөнгә көнгә тиклем колхоздарға ҡайтарып бирмәгәндәр.

Дебитор бурыстар кәмеү урынына, айҙан-айға арта бара. Март айы аҙағына был сумма район буйынса 33 мең һумдан артып китте. Тикшереү үткәрелгән бары тик 8 колхозда ғына 55 мең һумдан артыҡ аҡсаның урынһыҙ тотолғаны беленде.

Район прокуратураһы һәм суд органдары ла ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоусыларҙы үҙ ваҡытында яуапҡа тарттырмайҙар. Айырым енәйәтселәр тураһында бирелгән материалдар бик оҙаҡ тикшерелмәйенсә ятҡырылалар. Мәҫәлән, «Красный Урал» колхозында Сәйфуллин тигән береү 1941 йылдан башлап, 1946 йылға тиклем хисапсы булып эшләй. Был ваҡыт эсендә ул колхоздың бик күп продуктыларын һәм аҡсаһын үҙләштерә. Суд органдары һәм прокуратура уның эшен бик оҙаҡ тикшермәй ятҡырҙы. Шунан файҙаланып, Сәйфуллин бөтөнләй ситкә күсеп китә.

Йәки бына «Эйсеҡ» ауыл хужалығы артелендә тирмән мөдире булып эшләгән Титовты алайыҡ. Ул колхоз правлениеһының контроль яһамауынан файҙаланып, законһыҙ бик күп гарнц йыйнай, уны үҙләштерә. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы рөхсәтенән башҡа баҡса өсөн колхоздың 0,43 гектар ерен файҙалана һәм 7 гектар колхоз бесәнен сабып ала. Был енәйәтсегә ошо көнгә тиклем ел-ямғыр тигәне юҡ. Ул үҙенең енәйәтен йәшереү маҡсаты менән был колхоздан китә.

Ҡайһы бер колхоздарҙа хеҙмәт көндәрен өрәм-шәрәм итеүгә лә юл ҡуялар. Райондың 9 колхозында үҙған йыл идара итеү составын хеҙмәтләндереүгә 3575 хеҙмәт көне артыҡ тотолған. Был бигерәк тә «Нур», «Морҙаҡай», «Яңы юл», «Красная заря» колхоздарында киң урын алған.

Райондың ҡайһы бер етәксе работниктәре, хеҙмәт урындарынан файҙаланып, үҙған йыл колхоздар өсөн ебәрелгән 56 сепараторҙың 24-ен үҙҙәренә бүлешеп алдылар. Ә күп кенә колхоздар сепараторһыҙ йәшәүҙә дауам итәләр.

Х. Тереғолов.

Редакцияға хат

Механик завод ярҙамға мохтаж

Башҡортостан урындағы промышленность Министерствоһының Өфөләге механик заводы колхоздар өсөн дүрт атлы молотилкалар эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙе. Машинаның ҡеүәте сәғәтенә 5 — 6 центнер ашлыҡ һуғыуға иҫәпләнгән. Завод тарафынан сығарылған беренсе машиналар республиканың Ауыл хужалығы Министерствоһы тарафынан хупландылар һәм ҡабул ителделәр.

Завод яҡын ваҡыт эсендә яңы продукцияның беренсе серияһын—50 машина эшләп сығарасаҡ. 1948 йылда бөтәһе 500 молотилка сығарылырға тейеш.

Ләкин шуны әйтергә кәрәк, завод ошо бурысты тормошҡа ашырыуҙа үҙенә тейешле ярҙам ала алмай әле.

Үткән йылдың 1 октябрендә БАССР Министрҙар Советы заводҡа уның үҙ территорияһындағы элекке бер гаражды бирергә ҡарар ҡабул иткәйне. Ә Өфө ҡала Советы исполкомы был гаражды бирмәйенсә үҙенең автомашиналары өсөн файҙалана. Нисек кенә гәжәп булмаһын, завод молотилкаларҙы үҙенең клубында ғына эшләргә мәжбүр була.

РСФСР Министрҙар Советының заданиеһы буйынса ағымдағы йылда завод колхоздар өсөн күп һанда ауыл хужалығы инвентарҙәре, мәҫәлән, 160 мең дана тимер көрәк, 50 мең дана һәнәк, 35 мең дана тырма эшләп сығарырға тейеш. Ләкин тейешле күләмдә металл бүленмәүе арҡаһында завод планды үтәүгә тотона алмай. Ни өсөндер урындағы промышленность Министерствоһы һәм ҡаланың партия, совет ойошмалары заводтың эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар.

В. Хәмит.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

Шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн ярыштың Мәскәүҙә уйнала торған икенсе артыһы 10 апрелдә Союздар Йортоноң Колонналар залында тантаналы рәүештә асылды.

Һүрәттә: Матч-турнирҙә ҡатнашыусылар. Уңдан һулға — гроссмейстер Михаил Ботвинник, донъяның элекке чемпионы Голландия гроссмейстеры Макс Эйве, Америка чемпионы Самуил Решевский, СССР гроссмейстеры Василий Смыслов һәм СССР чемпионы Пауль Керес.

Е. Халдей фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

Донъя шахмат чемпионаты

25 апрелдә донъя беренселеге өсөн шахмат чемпионатының ун етенсе туры уйналды. Был турҙа Эйве—Ботвинник һәм Смыслов менән Керес осрашҡылар.

Эйве — Ботвинник уйынында, уларҙың Гаагала беренсе осрашыуындағы кеүек үк, Француз партияһы варианты ҡабатланды. Улар, фигураларҙың күбеһен алмашып бөткәс, 29 йөрөштән һуң, уйынды бер яҡтың да отмауы менән тамамларға риза булдылар.

Смыслов менән Керес партияһында ферзь гамбитенең варианттарының береһе уйналды.

Керес уйын башын бик үҙенсә уйнаны, ләкин слон менән манёврҙар яһау һөҙөмтәһендә, темп юғалтты. Шул арҡала Смыслов, 29 йөрөштән һуң, бер пешка отто.

Был уйын кисектерелгәйне. Керес уны ҡабатлап тормай, Смысловҡа тапшырҙы.

Ун ете турҙан һуң турнирҙа ҡатнашыусыларҙың хәле түбәндәгесә: Ботвинниктең 13 мөмкинлектән—9,5. Керестең ун дүрттән — 7,5, Смысловтың—7, Решевскийҙең ун өстән — 6,5, Эйвенең ун дүрттән — 3,5 очкаһы бар.

(ТАСС).

Колхозсыларҙың квартираларында телефондар

НИКОЛАЕВ. (ТАСС). Яҙғы сәсеү кампанияһы башланыуға Барваровка һәм Ново-Одесса районының 13 ауыл телефонлаштырылды. Владимировка ауылында 100 номерлы яңы коммутаторҙы оборудовать итеү тамамланды. Учреждениеларҙы, колхоздарҙы производство бинаҙарына, шулай уҡ бригадирҙарҙың, звеноводтарҙың, ауыл интеллигенцияһының квартираларына телефондар ҡуйылды.

Малсылыҡ фермалары өсөн яңы машиналар

Ауыл хужалығы машиналары төҙөү предприятиелары малсылыҡ фермалары өсөн яңы машиналарҙы эшләп сығара башланылар.

Гомель заводы бесән ваҡлау өсөн тирмән эшләп сығарҙы. Эшкәртеү һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән он мал аҙығына китә. Уны ҡулланғанда һөт биреүсәнлек 20—25 процентҡа арта. Яңы машина сәғәтенә 500 килограмм он тарта. Ошо уҡ завод силос киҫеү өсөн комбайн машина эшләп сығарҙы. Ул силос өсөн булған үҫемлектәрҙе ваҡлай, ә унан һуң барлыҡҡа килгән массаны 12 метрға тиклем бейеклектә булған башняға автоматик рәүештә күтәрә.

Курган заводы бесәнде ҡыҫып бәйләй торған машиналарҙы күпләп эшләп сығара башланы. Ул сәғәтенә бер тоннаға тиклем бесән бәйләй. Был машинаны ике кеше хеҙмәтләндерә.

Ауыл хужалығының яңы ҡеүәтле күтәрелеше өсөн!

Кисә «Правда» газетаһында «Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгөнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында» СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителде. Совет халҡының Социалистик игенселектең сәскә атыуы өсөн көрәш тарихенә айырыуса ҙур әһәмиәтле яңы документ инде. Ауыл хужалығы работниктәре игенселектең культураһын күтәреү өсөн көрәшкә колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың бөтә көстәрен һәм средстволарын мобилизациялауҙың яңы ҡеүәтле ҡоралын үҙ ҡулдарына алдылар.

СССР Верховный Советы Президиумы 1947 йылда юғары урожай алғандары өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында Указ сығарғандан һуң бер йылдан аҙ ғына артығыраҡ ваҡыт үтте. Партияның һәм хөкүмәттең хәстәрлеге менән рухланған миллионлаған колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре ВКП(б) Үҙәк Комитеты Февраль Пленумының тарихи ҡарарҙарын үтәү өсөн киң йәйелдерелгән большевистик һөжүмгә күстеләр. Ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреү, иген әҙерләү пландарын үтәү һәм арттырып үтәү, аҙыҡ-түлек продуктыларына карточкаларҙы бөтөрөү, хаҡтарҙы түбәнәйтеү, хеҙмәтсәндәрҙең йәшәү кимәлен күтәреү — ошо бөйөк һөжүмдең бөтә кешегә билдәле булған һөҙөмтәләре шундайҙар. Һуғыш яраларын уңышлы рәүештә уңалтып, 1946 йылғы ҡаты ҡоролоҡтоң эҙемтәләрен бөтөрә барып, социалистик игенселек 1947 йылда үҙенең бөртөклө ашлыҡ продукцияһын 58 процентҡа арттырҙы. Государство һуғышҡа тиклемге иң яҡшы йылдарҙа күпме иген алған булһа, шул тиклем самала уҡ иген алды.

Бөтә өлкәләрҙе, райондарҙы, колхоздарҙы, совхоздарҙы һәм МТС-тарҙы солғап алған социалистик ярыш 1947 йылда ауыл хужалығын күтәреүҙә ҙур роль уйнаны. Үҙған йылдағы Указда билдәләнгән күрһәткестәргә өлгәшеү өсөн көрәштә ауыл хужалығы алдынғыларының ҙур армияһы үҫеп сыҡты. Иген фронтында күренекле уңыштарға өлгәшкәндәре өсөн юғары исем бирелгән Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының күп һанлы отряды ошо данлы армияның башында бара. Хәҙерге ваҡытта инде бары тик СССР Ауыл хужалығы Министерствоһы системаһы буйынса ғына ла 1.395 колхозсы, тракторист һәм ауыл хужалығының башҡа работниктәре Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алдылар. Социалистик игенселектең унар меңләгән алдынғы кешеләре СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградландылар. Ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлауға материалдарҙы ҡарау дауам итә.

Колхоздар, совхоздар һәм МТС-тар өлгәшкән уңыштарҙа большевиктар партияһының ҡеүәтле етәксе, мобилизациялаусы һәм ойоштороусы роле асыҡ күренде. Партия ауыл хужалығын һуғыштан һуң күтәреү өсөн юлдар күрһәтте. Партия ошо күтәрелешкә өлгәшеү өсөн дөйөм халыҡ көрәшенең байрағын күтәрҙе. Партия совет крәҫтиәндәрен юғары урожай өсөн героик көрәшкә рухландырҙы. Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын үҫтереү буйынса партияның ҡарарҙары һәм бөтә ойоштороу эшмәкәрлеге социалистик төҙөлөш менән большевиктарса етәкселек итеүҙең өлгөһө булып хеҙмәт итәләр. Уларҙа коммунизм төҙөү тураһында Ленин—Сталин учениеһенең бөтәһен дә еңә алыусы көсө тупланған.

Ауыл хужалығының һуғыштан һуңғы күтәрелеше өсөн көрәштә большевиктар партияһының етәкселегендә беренсе ҙур еңеүгә өлгәшелде. Хәҙер социалистик игенселек алдына яңы бик ҙур бурыстар баҫты. Үҙәк бурыс, 1947 йылғы уңыштарға таянып, совет баҫыуҙарының урожайлылығын артабан дөйөм күтәреүгә өлгәшеүҙән тора. Һүҙ, алдынғы кешеләрҙең үҙған йылғы өлгәшеүҙәрен беҙҙең бөтә ауылдарыбыҙға күсереү тураһында бара.

СССР Верховный Советы Президиумының кисә иғлан ителгән Указының бөйөк әһәмиәте шунан тора, ул юғары урожай өсөн, ауыл хужалығының артабан күтәрелеше өсөн колхоз крәҫтиәндәренең героик көрәшен ойоштороуҙа алға табан яңы бер аҙымды билдәләй. Ауыл хужалығының төп культуралары урожайлылығын арттырыу ауыл хужалығын артабан күтәреүҙә мөһим бурыс булып торғанлығын иҫәпкә алып, СССР Верховный Советы Президиумы 1948 һәм 1949 йылдарға яңы тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәр билдәләне. Уларҙы үтәгән ваҡытта ауыл хужалығы работниктәре Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алалар һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланалар.

Ҙур майҙандан юғары урожай йыйнап алыу һәм урожайлылыҡтың дөйөм күтәрелешенә өлгәшеү — яңы Указдың төп идеяһы бына шунан тора, большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте беҙҙең ауылыбыҙҙы бына шуға саҡыра.

Партия һәм хөкүмәт урожайлылыҡты артабан күтәреү, шулай уҡ малсылыҡты күтәреү эшенә ниндәй ҙур әһәмиәт биреүҙәре тураһында клевер, люцерна һәм тимофеевка орлоҡтарын йыйнап алыу буйынса билдәләнгән күрһәткестәр һөйләйҙәр. Был күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау башҡарыла. Үлән сәсеүҙе үҫтереү—беҙҙең бөтә игенселегебеҙҙең культураһын күтәреүҙең мөһим сараһы булып тора.

Яңы Указдың шул үҙенсәлеген дә билдәләмәй үтергә мөмкин түгел, был Указда иң мөһим культура—көнбағыштан урожай алыу буйынса күрһәткестәр индерелде. Был күрһәткестәрҙе билдәләү — халыҡтарҙы аҙыҡ-түлектең иң мөһим төрө—үҫемлек майы менән, ә промышленносте — техник сырье менән тәьмин итеү тураһында партияның һәм хөкүмәттең арымай-талмай хәстәрлек итеүенең яңы кәүҙәләнеше булып тора.

Ауыл хужалығы культураларының урожай биреүсәнлектәре буйынса күрһәткестәрҙең зона принциптәрен билдәләү яңы Указдың мөһим үҙенсәлеге булып тора. Үҙған йылда илебеҙҙең бөтә ауыл хужалығы зоналары өсөн урожай алыу буйынса берҙәм күрһәткестәр билдәләнгән булһа, ә яңы күрһәткестәр теге йәки был зонаның үҙенсәлектәренә, уның климат һәм тупраҡ шарттарына бәйләнешле рәүештә дифференциялланғандар.

Теге йәки был зонаның үҙенсәлектәрен иҫәпкә алып, урожай буйынса күрһәткестәр билдәләү менән партия һәм хөкүмәт ауыл хужалығын үҫтереү менән дифференциалы етәкселек итеү өлгөһө күрһәтәләр.

Яңы Указ бер йылға түгел, ә ике йылға күрһәткестәр билдәләй. Быны менән партия һәм хөкүмәт ауыл хужалығы работниктәрен алға табан ҡарарға, перспектива менән йәшәргә һәм эшләргә өйрәтәләр. 1948 йылғы өлгәшеүҙәр 1947 йылғы эш һөҙөмтәләренә бәйлеле булған кеүек үк, 1949 йылғы өлгәшеүҙәр колхоздарҙың, совхоздарҙың һәм МТС-тарҙың ағымдағы йылдағы эштәре менән билдәләнәсәк.

СССР Верховный Советы Президиумы Указы илебеҙҙә яҙғы сәсеү йәйелдерелгән моментта иғ- совет ойошмаларының кисектергеһеҙ бурысы бөтә колхозсыларға, һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарға, МТС һәм совхоз работниктәренә Указды киң рәүештә һәм һәр яҡлап аңлатыуҙан тора. Баҫыуҙарҙың һәр бер эшсеһе Указда билдәләнгән күрһәткестәргә өлгәшеү, юғары урожай алыу һәм бөтә халыҡтың хөрмәтен алыуға уның көсөнөң килгәнлеген һәм мөмкинлектәре булғанлығын белергә тейеш. Шуның менән бергә, киң массаларға һүҙҙең ҙур булмаған участкаларҙа рекорд урожайҙары йыйнап алыу тураһында түгел, ә беҙҙең бөтә баҫыуҙарыбыҙҙың урожай биреүсәнлектәрен артабан күтәреү тураһында, бөтә социалистик игенселекте ҡырҡа күтәреү тураһында барғанлығын аңлатырға кәрәк.

Иптәш Сталинға яҙған хаттарында колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктәре юғары урожайҙы йыйнап алыуға булған тайпылышһыҙ теләктәрен демонстрациялайҙар. Указда билдәләнгән яңы күрһәткестәр баҫыу эшселәренең үйҙарын, ынтылыштарын һәм пландарын сағылдырыуына ышаныу өсөн колхозсыларҙың һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙған йылғы йөкләмәләре менән быйылғы йөкләмәләрен сағыштырып ҡарау ҙа етә.

Хәҙер колхоз ауылының Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме һәм наградалар алған алдынғы кешеләре үҙған йылдағы кеүек үк ауыл хужалығында йәйелдерелгән яңы ҡеүәтле хәрәкәттең авангардында баралар. Юғары награда менән дәртләнгән хәлдә улар яулап алған позицияларын нығытасаҡтар һәм үҙҙәренең өлгәшеүҙәрен арттырасаҡтар. Уларҙың девизе: арымай-талмай алға, тағы ла юғарыраҡ урожайҙар алыуға барырға. Уларҙың героик образында колхоз крәҫтиәндәренең иң яҡшы сифаттары, уның ялҡынлы совет патриотизмы, уның батмаҫ-тәкәмаҫ ижади мөмкинлектәре тупланды. Юғары урожай өсөн дөйөм колхоз походында ҡатнашыусы миллионлаған кешеләр уларға тиңләшәләр, уларҙан өйрәнәләр һәм уларға оҡшарға тырышалар. Уларҙың сафтары бөйөк Сталинсе эпохаға лайыҡлы булған күренекле яңы мастерҙар, урожай ижадсылары менән тулылана һәм тулыланасаҡ.

Хеҙмәтсәндәрҙең материаль яҡтан яҡшы көн-күрешенең яңы күтәрелеше өсөн һәм беҙҙең Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн дөйөм халыҡ көрәшендә совет крәҫтиәндәре маҡтаулы урын алып торалар. Аҙыҡ-түлек продуктыларының муллығы өсөн көрәшеп, ул совет обществоһының коммунизмға күсеүенең мөһим шартын әҙерләй. СССР Верховный Советы Президиумы Указы үҙҙәренең Тыуған илдәре өсөн, коммунизмдең бөйөк бинаһын төҙөүҙә үҙенең героик хеҙмәте өсөн колхоз крәҫтиәндәренең ғорурлыҡ тойғоһон тағы ла юғарыраҡ күтәрә. Ул колхозсыларҙы һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙы яңы подвигтарға һәм яңы данға саҡыра. Бөйөк Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә, совет халҡының юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы иптәш Сталиндең аҡыллы етәкселегендә колхоз крәҫтиәндәре баҫыуҙарҙа үҙҙәренең хеҙмәттәре менән данлыҡлы яңы еңеүҙәргә өлгәшәләр.

Юғары урожайҙарға, беҙҙең илебеҙҙә аҙыҡ-түлектең муллығына!

(«Правда» газетаһының 26 апрель баш мәҡәләһе).

Сит илдәрҙән телеграммалар

Австрия эшселәре берҙәмлегенең ныҡлығы

ВЕНА, 23 апрель. (ТАСС). Күптән түгел Венгрияның күп кенә предприятиеләренең коллективтәре Австриялағы промышленность тармаҡтары предприятиеләренә Беренсе Май байрамын байрам итеү өсөн үҙҙәренең делегацияларын Венгрияға ебәрергә саҡырып хат яҙҙылар. Австрия социалистик партияһының һуңғы ваҡытта яңы демократия илдәренә, шул иҫәптән Венгрияға һәр төрлө ялғандар яғыусы уң лидерҙәре ныҡ борсолдылар. Австрия предприятиеләрендә шундағы социалистик партия етәкселәренең белдереүе таралды. Был белдереүҙә бөтә эшсе-социалистарға Венгрияға китәсәк делегациялар составына инеү ҡәтғи рәүештә тыйыла. Күп кенә предприятиеләрҙә социалистик активистәр партия етәкселәренең приказы буйынса ошо ебәрелгән саҡырыу хаттарын үҙ ҡулдарына алырға һәм уларҙы эшселәрҙән йәшерергә маташтылар, ә көнбайыш зоналарҙа оккупацион властәр был саҡырыу хаттарын «өйрәнеү» өсөн үҙҙәренә алдылар һәм уны әлегә тиклем эшселәргә бирмәйҙәр.

Ләкин, газеталарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Австрия эшселәр хәрәкәтендәге тарҡатыусыларҙың һәм оккупацион властәрҙең тығылыуына ҡарамаҫтан, Австрия предприятиеләрендә делегацияларҙы Венгрияға ебәреүгә әҙерләнеү ныҡлы рәүештә алып барыла, ә делегациялар составына партия етәкселәренең приказын үтәүҙән баш тартыусы бик күп эшселәр — социалистәр инә. Мәҫәлән, «Броун—Бовери» фирмаһының иң ҙур предприятиеләрендә делегация составына өс социалист, бер коммунист һәм бер партияһыҙ кеше ингән.

„Төньяҡ-көнбайыш Атлантика блогын“ төҙөү планы тураһында „Жице Варшавы“ газетаһы

ВАРШАВА, 24 апрель. (ТАСС). «Жице Варшавы» газетаһы «АҠШ яҡлаған блоктар һәм союздар» тигән баш аҫтында кисә Англияның һәм Американың тыныслыҡты ныҡытыуға ҡаршы йүнәлтелгән дипломатик маневрҙәре тураһында үҙенең Лондондағы хәбәрсеһенең мәҡәләһен баҫып сығарҙы.

Март аҙағында, тип яҙа хәбәрсе, Вашингтонда — «төньяҡ-көнбайыш Атлантика блогын» төҙөү планын эшләү маҡсатында АҠШ һәм Англия вәкилдәре араһында кәңәшмә башланды.

Бевин һәм Маршалл «төньяҡ-көнбайыш Атлантика блогының» инициаторҙары булып торалар. Уларҙың пландарына ярашлы рәүештә Атлантик океандың яр буйҙарына урынлашҡан бөтә илдәр ошо блокка инергә тейештәр.

Атлантик блок, шулай уҡ яңы ғына формировать ителгән «Көнбайыш Европа союзы» (Англия, Франция һәм Бенилюкс илдәре —йәғни Бельгия, Голландия, Люксембург) дөйөм блок төҙөргә тейештәр, Америка был блокка гарантия бирәсәк.

Бевин һәм Маршалл был проблеманы алдан тикшереп ваҡытта, «төньяҡ-көнбайыш Атлантика блогын» төҙөү бик ашығыс проблема булып тора, тигән ныҡытмаға килгәндәр.

Ошо күрһәтелгән союз рамкаһарында армияларҙы унификациялау, ҡоралдарҙы стандартлаштырыу һәм Атлантик океандың Европа яр буйҙарында уртаҡ терәк пункттарын булдырыу күҙҙә тотола.

Бевиндең фекеренсә, был союзға Скандинавия илдәрен индереү менән бәйләнештә, ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар килеп тыуыуы ихтимал, сөнки был илдәрҙә әлегә тиклем нейтралитет тенденцияһы бик көслө әле. Ошо маҡсатта Скандинавия илдәренең общественный фекерен алдан үҙгәртергә һәм был өлкәлә дипломатик мөнәсәбәттәр, разведканы һәм матбуғатты файҙаланыу һәм илдәр араһындағы дуҫлыҡ бәйләнештәрен ныҡлы итеү юлдары менән пропаганда йәйелдерергә ҡарар ителде.

«Төньяҡ-көнбайыш Атлантика блогы» тураһындағы договорҙың текстын Маршалл менән Бевин тикшереү өсөн һәм был договорҙың нигеҙен Көнбайыш Европаның бишен союзы менән бәйләнештә тотҡан принципиаль формулировкаларын эшләү өсөн Бевин һәм Бидо Вашингтонға барырҙар ахырыны.

Договор Вашингтонда төҙеләсәк. Ошо маҡсатта ҡалған государстволарҙың сит ил эштәре министрҙары унда саҡырыласаҡ.

АҠШ общественное фекеренең отклигтәре конгресска күрә йогонто итәйҙе һәм ике яҡлы союзға гарантиялар бирергә комиссиялар, бер ниндәй ҡыуыш, Трумэн һәм Маршалл Бевинға, Бидоға һәм Спаакҡа һәм Норвегияның сит ил эштәре министре Лангегә АҠШ вәкилдәр палатаһының һәм сенатының берләшкән ултырышында юғарыла күрһәтелеп үтелгән илдәр араһындағы договорҙы ратификацияларға саҡырып сығыш яһарға тәҡдим иттеләр.

Ҡайнар телмәрҙәр, яҡшы ҡарарҙарҙан һуң...

Потребителдәр обществолары вәкилдәренең Башҡортостан съезды бөтөүгә бер ай ваҡыт үтте. Ошо ваҡыт эсендә был съезд ҡарарҙары нисек тормошҡа ашырыла? Шунда бәләкәй ғына бер миҫал. Съезд делегаттары кооперация эшселәренең, баҙар хеҙмәткәрҙәренең ауыл ерендә ҡулланыусыларға хеҙмәт күрһәтеү эшен ныҡлы яҡшыртырға тейешлеген билдәләне.

Башкоопторг бөтә Өфөгә көн һайын 4—4,5 бидон һөт индерә, дөрөҫөрәге уны Иглин районынан бер колхоз килтерә. 4,5 бидон һөт, билдәле, уймаҡ менән генә үлсәп һатыуға ла етмәй. Башсоюздың әҙерләү эше менән шөғөлләнеүсе работниктәре быны бик яҡшы беләләр. Ләкин улар: «һәмә эшләйек һуң, беҙгә колхоздар ҙа, колхозсылар ҙа һөт һатмайҙар бит», тип зарланыуҙан башҡаны белмәйҙәр. Шулай ҙа улар һөт әҙерләүҙең бер екел «метод»ын уйлап сығарғандар: Маслопром менән договор төҙөгәндәр ҙә, имеш ул уларға һөттө әҙерләп бирә. Башсоюздың әҙерләүҙәр аппаратындағы яуаплы работниге иптәш Кәримовтың әйтеүенә ҡарағанда ул былай эшләнәсәк: колхозсы маслопромдың ауылдағы ҡабул итеү пунктына барып һөт тапшыра, пункт һөтте маслопромға оҙата, ә маслопром һөттө сепарат аша үткәреп, артыҡ һөтте Башсоюзға ебәрә.

Съезд ҡарарында ла әйтелгәнсә, потребкооперацияның төп бурысы ауылда тауар әйләнешен киңәйтеү. Был эштә Башкоопторгтың Өфөләге магазиндарында ла етешһеҙлектәр бар. Мәҫәлән, магазиндарҙа ашҡаҙан, ҡала халҡы һорап торған күп кенә тауарҙар юҡ.

Билдәле, ул ваҡытта Коопторгтың Өфөләге магазиндарында кооператорҙар һәм һөт-продуктылар бик һирәк осрай йәки бөтөнләй булмай ине. Ләкин төп кимселектәр әле лә бөтмәгән. Башкоопторгтың күп магазиндарында ҡарағанда, кәрәкле тауарҙар булмай, ә булғандары ла насар сифатлы.

Аҙналар ҙа үтте, ай ҙа үтеп бара, ә Кооптөрг магазиндарында хәл үҙгәрмәне: һөт тә, ҡаҙ иттәре лә юҡ. Башкоопторгтарҙа әлә коштар бөткәнме, әллә һыйырҙар һауылмай башлағандармы? Юҡ. Бөтә был — Башпотребсоюз системаһындағы бик ҙур әҙерләү аппаратының иҫ киткес насар эшләүендә.

Беҙ был йыл бер ҡатлы тикшереп ҡараныҡ: 1949 йылда тотош Башпотребсоюз системаһындағы үткән әҙерләүҙәр ашҡыу эсендә әҙерләнгән ҡоштар һаны. Ошо ҡалала системаның әҙерләү аппаратында даими эшләүсе 400 работниктан күберәге бүлеп ҡараныҡ.

Бер һүҙ менән генә әйткәндә, һөт кооперацияға нисек бер машинәгә ҡәтһеҙ үҫә килеп инә.

Билдәле булғанса, потребкооперация әҙерләүҙәр мәсьәләһендә Маслопромға ҡарағанда күп өҫтөнлөктәр менән файҙалана. Уның ҡулында аҡса ла, тауар ҙа бар. Шуға ҡарамаҫтан, ауыл хужалығы продуктыларын әҙерләүҙәге ошо тиклем ғәмһеҙлектең әлегә тиклем йәшәүе бик ғәжәп.

Х. Рафиков.

Улар йәтим түгел

Өфө ҡалаһының дүртенсе номерлы балалар йортонда Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған совет воиндарының балалары тәрбиәләнәләр. Балалар йортонда тәрбиә эше яҡшы ҡуйылған, бында балалар йәтимлек тоймай, шат һәм таҙа үҫә.

Һүрәттә: Тәрбиәсе иптәш Л. Мөрсәлимова балаларҙың һөйләү һәләтлеген арттырыуға өйрәтеү үткәрә. Уның янында Ж. Кириллова, Ғ. Ҡарағужина һәм Сафиуллиндар.

В. Жданов фотоһы.

Балаларҙың байрамға әҙерлеге

Башҡорт АССР-ы Мәғариф эштәре Министерствоһының мәктәптән тыш тәрбиә бүлегенең начальнигы С. К. Ремезова Өфө ҡалаһындағы балалар баҡсаларында 1, 2, 3 май көндәрен нисек үткәреү тураһында беҙгә түбәндәгеләрҙе хәбәр итте:

— Өфөлә бөтәһе 48 балалар баҡсаһы бар. Унда 3.137 бала тәрбиәләнә. Был баҡсаларҙың бөтәһендә лә байрам көндәре ҡыҙыҡлы һәм күңелле үтһен өсөн планлы әҙерлек алып барыла. Мәҫәлән, 1 майҙа бөтә балалар баҡсаларында төрлө уйындар, йыр һәм бейеүҙәр ойошторола. Быны өсөн һәр бер балалар баҡсаһында әҙерлек күптән үк башланды. Уйындарҙан һуң балаларға байрам бүләктәре биреләсәк.

Шулай уҡ байрам көндәрендә балаларҙы ҡала урамдарында йөрөтеү өсөн бер нисә тиҫтә махсус автомашина бүленде. Был көндәрҙә бөтә балалар ҙа киноларға, ҡурсаҡ театрына, Ленин йорт-музейенә, башҡорт халыҡ шағире М. Ғафуриҙең йорт-музейенә барасаҡтар.

Культура-ағартыу учреждениеләре работниктәренең семинары

ТУЙМАЗЫ. Күптән түгел район культура йортонда ауыл культура-ағартыу учреждениеләре работниктәре өсөн ике көнлөк семинар үткәрелде. Семинарҙа ауыл һәм колхоз клубтары, уҡыу өйҙәре һәм библиотека мөдирҙәренән 28 кеше ҡатнашты. Улар «ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашырыуҙа культура-ағартыу учреждениеләренең бурыстары», «Ауылда фәнни пропаганда эштәрен йәйелдереү», «Яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны үткәреү осоронда художестволы үҙешмәкәр түңәрәктәре һәм культуралы ял итеүҙе ойоштороу» тигән һәм башҡа темаларға бөтәһе 7 доклад һәм лекция тыңланылар.

Семинар барышында культура-ағартыу учреждениеләре работниктәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыу беседалары ойошторолдо.

Эшселәр өсөн торлаҡтар

Директоры иптәш Гуцаит булған завод ағымдағы йылда эшселәр, инженер-техник работниктәр һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн 16 квартиралы ике һәм 24 квартиралы бер йорт төҙөй. Был йорттар пар менән йылытыласаҡ, водопровод һәм канализация менән тәьмин ителә. Төҙөлөшкә 12 миллион һум аҡса ебәрелде.

Хәҙер төҙөлөш эштәренә әҙерлек бара. Ағас, таш һәм башҡа материалдар ташыла. Был йорттар ағымдағы йылда эксплоатацияға тапшырыласаҡ.

КӘЗӘЛӘРҘӘН ТӘҮГЕ ТАПҠЫР ДЕБЕТ АЛЫНДЫ

АҠЪЯР. «Таштуғай» колхозы үҙенең дебет кәзәләре менән бөтә Хәйбулла районында алдынғы урынды тота.

Фермала быйыл 200 баш дебет кәзәһе аҫырала. Ферма работниктәренең малдарҙы яҡшы тәрбиәләүҙәре һөҙөмтәһендә быйыл 200 баш кәзәнән 43 килограмм дебет алынды. Был, үҙған йылға ҡарағанда, бик күп артыҡ. Бында был аҙағына тиклем икенсе тапҡыр сифатлы дебет алыу өсөн кәрәкле саралар.

Нефтсе рационализаторҙар конференцияһы

Октябрьск нефтселәре һуңғы ваҡытта рационализатор тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыуҙа күп уңыштарға өлгәшеүҙәр. Улар үҙҙәренең ташламалы һәм ҡыйыу тәҡдимдәре менән нефть сығарыуҙы арттырыуға ярҙам итәләр. Былай эшләү эш һөҙөмтәлелеген арттырыу ғына түгел, ә бик ҙур экономия ла бирә.

Икенсе номерлы бораулау контораһының инженеры Шановик лебедканың һәм редукторҙың бетон фундаменте урынына металлик фундамент тәҡдим итте. Уның практик ҡулланыу ҙур техник-экономик һөҙөмтә бирҙе, бурауҙарҙы төҙөүҙе һәм монтажлауҙы, шулай уҡ вышкаларҙы яңы урынға күсереп ҡуйыуҙы тиҙләтте.

Ағымдағы йылдың беренсе кварталында «Туймазынефть» трестының төп предприятиеләре буйынса рационализаторҙар һәм уйлап табыусылар тарафынан 60-ҡа яҡын тәҡдим индерелде. Уларҙан күбеһе тормошҡа ашырылды инде.

Беренсе номерлы бораулау конторының мастеры иптәш Салов һуңғы ваҡыттағы күп кенә тәҡдимдәр индерҙе. Уларҙы производствола ҡулланыу бораулауҙа булған аварияларҙы бөтөрөү юлдарын байтаҡ яҡшыртырға ярҙам итте. Мастер Салов перфоратор өсөн шлипс, скважиналарҙың үҙәктәрен йыуҙырыу һәм цементаҡлау өсөн штуцер уйлап сығарҙы. Уның ошо ике тәҡдиме буйынса ғына

Күптән түгел Октябрьск ҡалаһында нефтсе рационализаторҙарҙың һәм уйлап сығарыусыларҙың булып үткән беренсе конференцияһы ошо мәсьәләләргә арналғайны. Конференцияла ижади эштең торошо һәм артабанғы бурыстар тураһында трестың баш инженеры иптәш Галонский доклад менән сығыш яһаны.

И. Болдогоев.

Тәнҡит һәм библиография

Ҙур тормош тураһында хәҡиҡәт

Ғәйнан Әмириҙең «Ҙур баҡса» тигән йыйынтыҡҡа урынлаштырылған хикәйәләр циклы, яҙыусының үҙ ижад үҫеше өсөн дә, дөйөм башҡорт совет прозаһы өсөн дә яңы бер күренеш. Ғ. Әмири был хикәйәләр тәркемен ҡаҡлы рәүештә «Ҙур баҡса» тип атаған, сөнки ундағы әҫәрҙәрҙең күпселегендә социалистик общество кешеләренең героик хеҙмәт, көрәштәр аша «Ҙур баҡса»—йәғни яңы тормош төҙөүҙәре көйҙәләндерелә. Яҙыусы художестволы, йыйнаҡ, поэтик алымдар һәм образларҙа совет кешеләренең социалистик индивидуаль черталарын күрһәтеп бирә. «Ҙур баҡса» хикәйәһендәге урман ҡарауылсыһы Усман ҡарт улы Нурғәли, партия ячейкаһы секретаре Шәрифулла, «Вагондағы» Ғиниәтулла, «Бер өйҙәң кешеләрендәге» Мәрйәм, Юныс, Гөлбәзирә, Йософ, «Өнөт орлоктарындағы» Илһам менән Салих, «Йырҙағы» Ғәлиәп ағай образдары һәм Бөйөк Ватан һуғышының күп һандағы батыр кешеләре —һәр береһе индивидуаль черталы характерҙар улар.

М. Горький өйрәтеүенсә, социалистик индивидуаллек тик коллектив хеҙмәт шарттарында ғына үҫә ала, был хеҙмәт үҙенең алдына социалистик обществолы төҙөү, кешеләрҙе коммунистик обществоға инергә әҙерләү тигән иң бөйөк һәм акыллы маҡсатты ҡуя. Ғәйнан Әмириҙең «Бер өйҙәң кешеләре», «Вагонда», «Өнөт орлоктары» тигән хикәйәләрендә, бигерәк тә «Ҙур баҡса» хикәйәһендә, аҡа ошо бөйөк маҡсаттарҙы үҙ алдына ҡуйған коллектив хеҙмәт поэзияһының кеше кешеләрҙең ижад шишмәләре асығыраҡ һәм тулыраҡ сағылдырылалар. Бөйөк Ватан һуғышына тиклем яҙылған хикәйәләрендә персонаждарға характерҙәрҙе формалаштырыу процесында художестволы дөйөмләштереп бирер һәләтенә тулыһынса эйә булмаған яҙыусы Ғ. Әмири, «Ҙур баҡса» хикәйәһендә ваҡиғаларҙы ҡатмарлы тарихи планда алып, хәрәкәт итеүсе төп образдарҙы үҫеш, хеҙмәт процесында формалашыу юлындағы индивидуаль черталарҙа һүрәтләп биреү оҫталығына ирешкән. Бында хикәйәнең төп геройы булған, Октябрьгә тиклем байҙар урманын ҡарауыллаусы, ярым, «Бүре Усман» улы Нурғәлиҙең тышҡы портрете генә түгел, рухи эске донъяһы ла ышандырғыс биҙәктәрҙә асыла. Капиталистик мысынбарлыҡ — хеҙмәт кешеләре өсөн трагик тормош, үлем килтерә, улар туҡтауһыҙ яҙмыш менән тартышалар, һәм общество тарафынан сетләтелгән урман ҡарауылсыһы Усман ҡарт та ана шундай трагик яҙмыш эсендә һәләк була ла. Уның улы Нурғәлиҙе лә шундай уҡ яҙмыш көтә, уның киләсәге ҡараңғы... Бары тик Бөйөк Октябрь революцияһы ғына үлемгә дусар ителгән Нурғәлиҙе ҡотҡара, азатлыҡҡа алып сыға. Ләкин быйың менән әгәнсе, индивидуалист Нурғәлиҙең эске донъяһындағы ҡаршылыҡтар хәл ителмәй әле; уға яңы общественный мөнәсәбәттәр, баштә, аҙ тәьҫир итә, шуға күрә лә ул бөтә яҡтан сикләнгән, һәләкәткә алып бара торған үҙ хосуси милкселек, милкселек идеялары менән йәшәй бирә. Обществола йәшәп тә обществолан азат булыу мөмкин түгел, тип өйрәтә беҙҙе бөйөк Ленин. Общество, коллективтең тәьҫирле көсө, кешене ҡайтанан үҙгәртеү көсө һөҙөмтәһендә, шәхси идеалдар менән генә сикләнгән «Үҙ баҡсаһының» һәләкәткә осрауын, тәрән рухани ғазаптарҙан һуң, Нурғәли аҡрынлап төшөнә. Коммунистик обществоның көсөн, сәскәһен ташкыл итәсәк «Ҙур баҡса» кешеләре, Шәрифулла кеүек ҡарт революционер, атайҙарса хәстәрле большевиктәр уға ярҙамға киләләр, ысын тормошҡа, йәшәү юлдары дан менән күмелгән «Ҙур баҡсаға» алып инәләр; Нурғәли рухи яҡтан яңыра, колхоздың алдынғы кешеһенә әүерелә. Яҙыусы кеше характерындағы был бөйөк үҙгәрешкә тура сюжет һыҙығы менән түгел, ә ҡатмарлы ситуация, эске кисерештәр аша һүрәтләй. Нурғәли ысынын да беҙҙең башҡорт совет прозаһында әлегәсә күренмәгән тәрән психологик образ. Авторҙың алынған ваҡиға һәм персонаждарҙың аш, хәрәкәттәрен беренсе заттан хикәйәләү алымын ҡулланыуы әҫәрҙең уҡыусыларҙы ышандырыу көсөн тағы ла арттыра төшә. Әҫәрҙә романдарға хас ҙур һәм бай ваҡиғалар алынған, быны шул иҫы менән «Ҙур баҡса» талантлы ҡәләм менән яҙылған.

Ғ. Әмири үҙ әҫәрҙәрен яҙғанда социалистик реализмдең төп принциптарын аңлап эш иткән. Ул йыйынтыҡҡа ингән әҫәрҙәрендә, әсәкке хикәйәләрендә йыш осрай торған геройҙарҙың тышҡы һәм эске портреттарын биреп бөтөрмәү кеүек ҙур кәмселектән ниғеҙҙә ҡотолған, ләкин яҙыусы әле очерк стиле һәм алымдарынан тулыһынса арынмаған «Йәлил», «Беренсе һикереүҙәге» очерк стиле уның «Ҙур баҡса», «Бер өйҙәң кешеләре», «Вагонда» кеүек хикәйәләрендә лә ныҡ һиҙелеп тора.

Яҙыусының төп бурысы—«ябай» кешеләрҙең тайғоларынан алыҫ торыусы, ысынҡан батыр, намыҫлы, һәм йәнле кешеләрҙе, тормоштағы йәки кешелек бахете өсөн дөйөм көрәштә ситеннәүсе, ҡыйын шарттарҙа, Макаренко әйткәнсә, ышанмаҫҡа булдыра алыусы кешеләрҙе, тулы рухани тормош менән йәшәй белеүсе яңы шәхестәрҙе, тәрән кисерештәргә лә, ҙур шатлыҡтарға ла һәләтле, булдыҡлы, ҡыйыу шәхестәрҙе тәрбиәләүҙә. Ситләтеп уҙа торған бөтә нәмә геройҙың образын ҡоролата, йәмһеҙләкә, шартлылыҡҡа алып бара. Характерҙы йәғни типты ул үҙе йәйелә алырлыҡ шарттарға ҡуймай тороп, характерҙы йәйелдереү мөмкин түгел. Ғ. Әмири үҙ хикәйәләрендәге персонаждарҙы бигерәк тә «Ҙур баҡсағы» Нурғәли образын типик шарттарҙа, ҡаршылыҡлы конфликттарҙа төрлө яҡлап йәйелдереп бирә, уҡыусыларҙы нисек булырға, үҙ ижад көсөндә ҡайҙа юналдерергә өйрәтә.

Шулай ҙа булһа ҙур идеяны, тәрән кейенсә тормоштағы ситеклектәр менән һуғарылмаған халдә, тәбиғи булмаған рәүештә күрһәтеү — схема тыуҙыра. Был схематизм элементтәрен беҙ Ғ. Әмириҙең «Бер өйҙәң кешеләрендәге» уҡытыусы Мәрйәм, Юныс һәм Гөлбәзирә образдарында, «Ҡош ояһы» хикәйәһендәге Александр Уткин, капитан Малахов типтарында күҙгә ташланғанлығын күрәбеҙ. Үҙҙә хәтерләнгән хикәйәләрҙә автор шулай уҡ кешеләрҙәге характерлә үҙенсәлектәрҙе төп маҡсат итеп ҡуйған булһа ла, бик ҙур ваҡиғаларҙы тулыһынса художестволы дөйөмләштереүгә ирешә алмаған, уларҙы бер өйөмгә өйөү йәки мөһим күренештә мөһим булмаған күренештәрҙән тейешенсә айырмау схематизмға алып килгән.

Стилдең төп ҡағиҙәһе —ул кешеләр башына килерерга теләгән фекерҙе генә күҙ уңында тотоу. Стиль — ул һүҙ генә түгел, ә идея һөҙөмтәһе. Ысынан да Ғ. Әмириҙең формалашҡан яҙыусы итеп күрһәтә алырлыҡ үҙ әҙәби стиле бармы һуң? Һис шикһеҙ, уның башҡа башҡорт прозаиктәренән айырып торған художество стиле, әҙәби манералары, һүҙ искусствоһы менән экономиялы эш итә белеү һәләте бар.

Беҙҙең яҙыусыларҙа социалистик төҙөлөштәге общественный фекерҙең ижади көсөн, хеҙмәт поэзияһының матурлығын тәрән итеп күрһәтеү етмәй әле. Яҙыусы был йүнәлештә етди аҙым яһай, тормоштоң мәғәнәүи тәрәнлеген, матурлығын һүрәтләүҙә яҡшы ғына өлгөләрҙе бирә. Ләкин Ғ. Әмири үҙ әҫәрҙәренең композицияһы менән тығыҙ бәйләнештә драматик күренештәрҙе төҙә белеү, пейзаждан файҙаланыу тәңгәлендә ныҡ, бик ныҡ уйларға тейеш.

Ысын мәғәнәһендәге реалистик әҫәрҙәр һәр ваҡытта, кешеләрҙә киләсәккә бөйөк идеалдарға табан ориентация яһай, юнәлеш бирә һәм хыялланырға мәжбүр итә торған романтик башланғыс була. Ләкин беҙҙең прозаиктәрҙә, ғөмүмән, башҡорт совет яҙыусыларында революцион романтика, фантазия, хыял исеү етмәй, ә күп ваҡытта бөтөнләй һиҙелмәй. Был хыялға, фантазияға, романтик тойғоларға ярлылыҡ Ғ. Әмириҙең һуңғы хикәйәләрендә лә («Ҙур баҡса», «Ҡош ояһы», «Йыр» һәм башҡаларында) мөһим кәмселек булып тора. Уның геройҙары күбеһенсә бөгөнгө тураһында ғына уйлайҙар, ә киләсәк тураһында аҙ хыялланалар. Был, һис шикһеҙ, хикәйәләрҙең художество достоинстволарын, йәшәүсәнлеген кәметә. Билдәле булыуынса, В. И. Ленин «Нимә эшләргә» тигән гүзәл китабында тормош һәм кешеләрҙәге хыял, романтиканы тәрән рәүештә билдәләп бирә.

Марксизм-ленинизм фәне хыялды, фантазияны, романтизмды инкар итмәй, ә, киреһенсә, хыял менән тормош араһындағы тығыҙ бәйләнешкә, кешеләрҙең үҙ фантазияларын тормошҡа ашырырға ынтылыуы өсөн юл һыҙа торған революцион романтизмды әҙәм-әҙәмгә ҡарашында тора. Социалистик реализм ижад методы совет яҙыусыларына бөгөнгө тормош яҡтылығында киләсәкте күрһәтеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе бирә. Беҙҙең башҡорт яҙыусылары, шул уҡ иҫәптә прозабыҙҙың үҙәгендә торған Ғ. Әмири, үҙ әҫәрҙәрен йәшәүсән, кинәйәле, фантазияға бай, рухани тәрән йәш өсөн бөтәһенән элек социалистик реализм менән ныҡ ҡоралланған булырға тейештәр.

Беҙҙең башҡорт совет яҙыусылары әҙәби культура, классик яҙыусыларҙың художество оҫталыҡтарын «йөрөт» үҙләштереү етмәй. Классик яҙыусылар теге йәки был әҫәрҙең идея йөкмәткеһен, һайланған төп проблемаларҙы, геройҙарҙың тулы характерын сағылдырыу маҡсатынан сығып эш иттеләр, шуға күрә уларҙың әҫәрҙәрендәге портреттарҙы күреү менән генә типтарҙың ниндәй характерҙа, ниндәй рухи хәлдә булыуҙарын аңлайбыҙ. Реаль тормошта бер кеше икенсеһенә үҙенең характеры менән, бигерәк тә тышкы ҡиәфәте, физиономияһы менән оҡшамаған кеүек, әҫәрҙәрҙә лә геройҙар бер-береһенә оҡшамаҫҡа, тышҡы физиономияһы, рухани донъяһы менән бер-береһенән айырылып торорға, уҡыусының хәтер запасында ҡала алырлыҡ үҙенсәлектәр, деталдәр менән күрһәтелгән булырға тейеш. Бына шундай формалы әҫәрҙәр тыуҙырыу, үҙ ижадтарын камиллаштырыу юлында беҙҙең башҡорт совет яҙыусыларына, иҫәптән Ғ. Әмиригә лә күп, бик күп эш һалаһы бар әле.

Ж. Ләмин.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25 Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—85-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00135. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х. — 1. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
1948 йыл
№ 86
30 апрель
йома
хаҡы 20 тин

Советтәр Союзының хеҙмәтсәндәре! Һуғыштан һуңғы биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Биш йыллыктың хәл иткес өсөнсө йылының планын бөтә төр продукциялар буйынса срогынан алда үтәйек!

(1948 йылдың 1 майына ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙарынан).

Беренсе Майға ҡарата боевой саҡырыуҙар

Кисә «Правда» газетаһында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 1 Майға ҡарата саҡырыуҙары иғлан ителде.

Хеҙмәтсәндәрҙең бөйөк байрамы алдынан Ленин—Сталин партияһының Үҙәк Комитеты Советтәр Союзының эшселәренә, колхозсыларына, интеллигенцияһына боевой саҡырыуҙар менән мөрәжәғәт итә. Был саҡырыуҙарҙа ныҡлы тыныслыҡ һәм халыҡ демократияһы өсөн көрәштә бөтә алдынғы кешелек донъяһының авангардында барыусы беҙҙең Тыуған илебеҙҙең иң мөһим халыҡ-ара һәм эске бурыстары ҡауҙаланған.

Бөйөк Советтәр Союзы — халыҡтарҙың тыныслығының һәм именселегенең, азатлығының һәм бойондороҡһоҙлоғоноң ышаныслы таянысы. Уның авторитеты бик ҙур, уның аҡыллы һәм ғәҙел тышҡы политикаһына миллионлаған хеҙмәтсәндәр массаһының ышанысы икһеҙ-сикһеҙ. 1 Май алдында Советтәр Союзының — беҙҙең данлы социалистик Ватаныбыҙҙың ҡеүәтле тауышы бөтә ер шарына яңғырай.

— Йәшәһен ныҡлы тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе халыҡтарҙың дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлеге!

Тыныслыҡ һәм демократия эшен ныҡлы һәм эҙмә-эҙлекле рәүештә яҡлап, совет халҡы бөтә халыҡтарға большевиктар партияһы Үҙәк Комитеты саҡырыуҙарының батыр һүҙҙәре менән мөрәжәғәт итә:

— Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре! Үҙегеҙҙең азатлығығыҙ һәм бойондороҡһоҙлоғоғоҙ өсөн көрәштә көстәрегеҙҙе туплағыҙ! Халыҡтарҙы иҙеүсе һәм ҡол итеүсе империалистик пландарҙы өҙөгөҙ!

Совет халҡы беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон намыҫ менән һаҡлап алып ҡалыусы үҙенең армияһын — азат итеүсе армияны тәрән хөрмәт һәм ихтирам менән котлай. Бөтә совет кешеләре исемендән большевиктар партияһы Советтәр Союзының ҡоро ер, хәрби-һауа һәм хәрби-диңгеҙ көстәре воиндарына мөрәжәғәт итә:

— Үҙегеҙҙең хәрби һәм политик белемдәрегеҙҙе арымай-талмай күтәрегеҙ, Бөйөк Ватан һуғышы тәжрибәһен үҙләштерегеҙ! Үҙегеҙҙең боевой оҫталығығыҙҙы камиллаштерегеҙ, совет государствоһының Ҡоралы Көстәренең ҡеүәтен нығытығыҙ!

Большевиктар партияһы үҙенең халыҡ менән бәйләнгән булыуы арҡаһында көслө, ул һәр ваҡытта ла халыҡ аңлағанды дөрөҫ сағылдырҙы һәм сағылдыра. Быйылғы 1 Май байрамын беҙҙең илебеҙ һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көрәштең иң ҡыҙыу сағында ҡаршы ала. Ошо данлы маҡсатҡа өлгәшеү өсөн совет халҡы көсөн дә һәм хеҙмәтен дә йәлләмәй. Совет халҡына — биш йыллыҡ өсөн көрәшеүселәрҙең ныҡ тупланған күп миллионлы армияһына мөрәжәғәт итеп, партияның Үҙәк Комитеты былай тип саҡыра:

— Советтәр Союзының эшселәре, крәҫтиәндәре, интеллигенцияһы! Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн, совет халҡының материаль көн-күрешен һәм культураһын артабан күтәреү өсөн көрәштә алға, яңы еңеүҙәргә!

Беренсе кварталдың хужалыҡ йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының күптән түгел иғлан ителгән белдереүе СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең көндән-көн үҫә барған темптар менән барыуы тураһында тулы итеп һөйләй. 1947 йылдың I кварталында промышленность продукцияһының үҫеүе, 1946 йылдың I кварталына сағыштырғанда, 12 процент, II кварталда — 18 процент, III кварталда — 26, IV кварталда — 30 процент тәшкил итте. Ә 1948 йылдың I кварталында промышленность продукцияһы тағы ла юғары күтәрелде. 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, ул 32 процентҡа үҫте.

Был һандар нимә тураһында һөйләйҙәр һуң? Улар беҙҙең промышленностебеҙҙең ышаныслы рәүештә тигеҙ, туҡтауһыҙ тешәүҙә белмәй торған алға табан хәрәкәт итеүе тураһында, аяҡҡа баҫтырылған һәм яңы предприятиеларҙың сафҡа инеүҙәре тураһында, хеҙмәт етештереүсәнлегенең масса рәүештә үҫеүе тураһында һөйләйҙәр. Ауыр индустрияның үҫеше промышленностең киң ҡулланыу тауарҙарын һәм аҙыҡ продукттарын эшләп сығарыуҙы киңәйеүе менән бер үк ваҡытта бара. Беҙҙең промышленносебеҙ халыҡҡа ай һайын күберәк туҡымалар, аяҡ кейемдәре, ит һәм кондитер изделиелары, май һәм шәкәр бирә. Совет ҡоролошо илебеҙҙең эшләп сығарыу көстәрен үҫтереү өсөн икһеҙ-сикһеҙ мөмкинлек асып, шул уҡ ваҡытта хеҙмәтсәндәрҙең имин көн-күрешенең өҙлөкһөҙ рәүештә күтәрелә барыуын тәьмин итә.

Ләкин, был уңыштар нисек кенә ҙур булмаһындар, улар совет кешеләрендә тыныслыҡ һәм өлгәшкәндәр менән риза булып ҡалыу тыуҙыра алмайҙар. Беҙҙең Тыуған илебеҙ тағы ла ҡеүәтлерәк һәм көслөрәк булһын өсөн, совет кешеләре тағы ла тәьмин ителгәнерәк һәм культуралыраҡ йәшәһендәр өсөн эшләп сығарыу һәм төҙөлөш темптарын тағы ла юғарыраҡ күтәрергә кәрәк.

— Советтәр Союзы хеҙмәтсәндәре! — тип саҡыра партияның Үҙәк Комитеты. — Һуғыштан һуңғы биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Биш йыллыктың хәл иткес өсөнсө йылының планын бөтә төр продукциялар буйынса срогынан алда үтәйек!

Совет Хөкүмәте халыҡ хужалығына бик ҙур средстволар бирә. Совет һумы — ныҡлы һәм тулы ҡиммәтле һум ул. Уны һаҡларға, уны эш өсөн урынлы, хужаларса, максималь файҙа менән расходларға кәрәк.

— Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ныҡлы экономия режиме өсөн, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү һәм сифатын яҡшыртыу өсөн көрәшегеҙ! — тип саҡыра партия беҙҙең илебеҙҙең хеҙмәтсәндәрен. — Хеҙмәт етештереүсәнлеген арымай-талмай күтәрегеҙ!

Үҙәк Комитет халыҡ хужалығының иң мөһим тармаҡтарының работниктарына мөрәжәғәт итә, улар алдына конкрет бурыстар ҡуя. Шахталарҙы аяҡҡа баҫтырыу һәм төҙөү темпын юғарыраҡ күтәрегеҙ, күмер сығарыуҙы бөтә саралар менән арттырығыҙ! Халыҡ хужалығы өсөн күберәк нефть продукттары бирегеҙ! — тип саҡыра партия күмерселәргә һәм нефтселәргә. Күберәк суйын, ҡорос, прокат, төҫлө металлар бирегеҙ! — тип мөрәжәғәт итә ул металлургтарға. Халыҡ хужалығы машиналар төҙөүселәрҙән күберәк автомобилдәр, тракторҙар, ауыл хужалығы һәм башҡа машиналар көтә.

Халыҡ өсөн туҡымалар, өҫ кейемдәре, аяҡ кейемдәре, трикотаж, аҙыҡ продукттары эшләп сығарыу тағы ла юғарыраҡ күтәрелергә тейеш. Карточка системаһы бөтөрөлгәндән һәм аҡса реформаһы тормошҡа ашырылғандан һуң хеҙмәтсәндәрҙең реаль эш хаҡы, йәғни уларҙың материаль яҡтан фактик тәьмин ителеүе бер ярым тапҡырҙан да артығыраҡҡа күтәрелде. Советтәр Союзында тауарҙар капиталистарҙы байытыу өсөн түгел, ә халыҡтың культура һәм көн-күреше ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн эшләнәләр. Беҙҙә кәрәгенән тыш артыҡ эшләп сығарыу кризистары юҡ һәм була ла алмай: тауарҙар ни тиклем күберәк булһа, совет кешеләре шул тиклем яҡшыраҡ һәм тәьмин ителгәнерәк йәшәйҙәр. Партия һәм хөкүмәт илебеҙҙә бөтә тауарҙарҙың муллығын булдырырға ынтылалар. Был муллыҡтың сиге юҡ, сөнки халыҡтың талаптары ла һәм был талаптарҙы ҡәнәғәтләндереү мөмкинлектәре лә туктауһыҙ рәүештә күтәрелә бара.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ — гигант төҙөлөш биш йыллығы ул. Немец-фашист оккупанттары тарафынан емерелгән заводтар, фабрикалар, шахталар, электр станциялары аяҡҡа баҫтырыла, ҡалалар һәм ауылдар тергеҙелә, яңы предприятиелар, торлаҡ йорттары, культура көн-күреш учреждениелары төҙөлә. Партия төҙөлөш эштәре темптарын күтәрергә, уларҙы механизациялаштырырға, үҙенә төшөү хаҡын кәметергә һәм сифатын яҡшыртырға, ҡалаларҙы һәм эшселәр поселкаларын төҙөкләндереү буйынса энергиялы һәм яҡшы эшләргә саҡыра. Эшселәр һәм инженерҙар — төҙөүселәр, ҡала хужалығы работниктары был саҡырыуға яңы хеҙмәт уңыштары менән яуап бирергә тейештәр.

Үҙәк Комитеттең саҡырыуҙары колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар алдына, социалистик ауыл хужалығының бөтә работниктары алдына боевой бурыстар ҡуя. Үҙған йылда улар юғары урожай өсөн көрәштә намыҫ менән еңеп сыҡтылар. Быйыл юғары урожай өсөн көрәштә алға табан яңы ҙур аҙым яһаларға тейеш. Бөтә халыҡ даны менән уратылып алынған ауыл хужалығы алдынғыларының тәжрибәләренә таянып, колхоздар, совхоздар һәм машина-трактор станциялары эшсәндәре социалистик игенселек культураһын тағы ла юғарыраҡ күтәрергә һәм большевиктар партияһының саҡырыуына эш менән яуап ҡайтарырға тейештәр.

— Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бөтә сәсеүлек майҙандарынан юғары урожай алыуға өлгәшегеҙ! Ауыл хужалығы алдынғыларының, орденлеләрҙең һәм Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының сафтарын арттырығыҙ!

Яҙғы сәсеү эштәре фронты көн һайын киңәйә бара. Ауыл хужалығы работниктарының патриотик бурысы — яҙғы сәсеүҙе өлгөлө итеп үткәреүҙән, юғары урожай үҫтереп алыуҙан һәм халыҡ өсөн аҙыҡ-түлек һәм промышленность өсөн сырье муллығына өлгәшеү өсөн көрәштә яңы уңыштарға ирешеүҙән гора.

Совет интеллигенцияһы Тыуған илебеҙ алдында, халыҡ алдында юғары яуаплылыҡ тойғоһо менән ВКП(б) Үҙәк Комитетенең Беренсе майға ҡарата саҡырыуҙарын ҡабул итәсәк. Большевиктар партияһы совет ғалимдарын беҙҙең илебеҙҙең фәнен һәм техникаһын яңы тикшеренеүҙәр, уйлап сығарыуҙар һәм яңылыҡтар менән байытырға, фәндең өлгәшеүҙәрен энергиялы рәүештә производствоға индерергә, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында артабан техник прогресты тәьмин итергә саҡыра. Әҙәбиәт, искусство, кинематография работниктары бөйөк совет халҡына лайыҡлы булған юғары идеялы, художестволы әҫәрҙәр тыуҙырырға тейештәр. Беҙҙең йәштәребеҙҙе совет патриотизмы, беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙгә фиҙакәр бирелгәнлек рухында тәрбиәләү — күп миллионлаған совет уҡытыусылары армияһының изге бурысы ул.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең саҡырыуҙары большевиктар партияһының кешеләр тураһында — эшселәр, крәҫтиәндәр, интеллигенция тураһында, уларҙың ихтыяждары һәм талаптары тураһында, уларҙың тормошоноң материаль һәм культура кимәлен күтәреү тураһында тәрән хәстәрлек менән һуғарылғандар. Ватан һуғышы инвалидтары тураһында, беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн үҙҙәренең ғүмерҙәрен биргән героик совет воиндарының семьялары тураһында партия айырыуса хәстәрлек күрә.

Совет ҡатын-ҡыҙҙарына — беҙҙең илебеҙҙең политик-хужалыҡ һәм культура тормошонда актив ҡатнашыусыларға, батыр, ныҡлы, теләһә нindәй ҡыйынлыҡтарҙы еңергә әҙер тороусы беҙҙең данлы йәштәребеҙгә партия йылы һәм яғымлы саҡырыуҙар менән мөрәжәғәт итә.

Большевиктар партияһы — совет халҡының һуғыштарҙа сыныҡҡан авангарды, беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙең рухландырыусыһы һәм ойоштороусыһы — бөйөк Ленин—Сталин партияһы совет государствоһының ҡеүәтен нығытыу өсөн беҙҙең халҡыбыҙҙың героик көрәшендә, үҙенең ярты быуат дауам иткән данлы тарихындағы кеүек үк, алда бара. Коммунистар һәм комсомолецтар биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн, социалистик Тыуған илебеҙҙең хужалығын һәм культураһын ҡеүәтле рәүештә яңынан күтәреү өсөн көрәшселәрҙең авангардында киләләр. Партияның һәм халыҡтарҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин беҙҙең илебеҙҙе данлы коммунизмға барыу юлы буйынса алып бара.

Совет халҡы Беренсе Май байрамын бөйөк рухланыу менән ҡаршыларға әҙерләнә. Ул үҙенең хеҙмәт данын яңы подвигтар менән арттыра һәм күтәрә. Лениндең — Сталиндең бөйөк эшенең тантана итеүенә булған тайпылмаһыҙ ышанысты ҡәүҙәләндереүсе һүҙҙәр СССР-ҙың бөтә халыҡтары телдәрендә яңғырайҙар.

— Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә, алға, коммунизмдең еңеүенә!

(«Правда» газетаһының 28 апрелдәге баш мәҡәләһе).

Башҡортостан эшсәндәре 1 Май байрамын хеҙмәт еңеүҙәре менән ҡаршылайҙар

Беренсе Майға ҡарата «Искусство» издательствоһы баҫып сығарған плакат. Художник Б. Иванов эше. ТАСС фотохроникаһы.

Пландан тыш

Баш инженеры иптәш Максимов булған заводтың коллективы Беренсе Май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахталар ойоштороп, биш айлыҡ планды дүрт айҙа үтәү менән ҡаршылау өсөн ныҡышмалы эш алып барҙы. Һөҙөмтәлә коллектив алған йөкләмәне — заводтың 4 айлыҡ планын апрелдең беренсе декадаһында уҡ үтәне. Хәҙерге көндә май айының планын үтәү буйынса коллектив графиктан 10 процентҡа алда бара. Социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүҙә начальниктары Пузаков һәм Срелков иптәштәр булған цехтар өлгөлө хеҙмәт уңыштары күрһәттеләр. Был цехтар биш айҙың планын 26 апрелдә уҡ үтәнеләр.

Заводтың алдынғы цехтары

Директоры иптәш Гуцайт булған завод коллективы бөтә завод күләмендә май айының планын 26 апрелдә 100 процентҡа еткереп үтәне. Май алды социалистик ярышында 5 айҙыҡ планын 4 айҙа тултырыу йөкләмәһен үтәү өсөн көрәштә заводтың алдынғы цехтары — начальниктары Свечников, Ежов булған цехтар бигерәк тә ҙур уңыштарға ирештеләр. Иптәш Ежов цехы май айында үтәләсәк программаны срогынан 45 көнгә элек һәм яҡшы сифатлы итеп башҡарҙы. Шулай уҡ цехтар араһындағы социалистик ярышта ҡатнашҡан, начальнигы иптәш Свечников булған цех икенсе квартал планын 26 апрелдә 100 процентҡа еткереп үтәне.

Был цехта эшләүсе стахановсы токарь Козлов, слесарь Сазонов, штамповщица Әхмәдуллина, Ахуньянова иптәштәр икенсе квартал планын 20 апрелдә уҡ үтәп сыҡтылар.

СССР Верховный Советы Президиумы Указына Башҡортостан игенселәре юғары урожай өсөн көрәште көсәйтеп яуап бирәләр

Указ беҙҙе яңы еңеүҙәргә рухландыра

1948—1949 йылдарҙа ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм уларҙы ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһындағы СССР Верховный Советы Президиумының Указын беҙ ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланыҡ.

Партияның һәм хөкүмәттең, һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндең колхоз крәҫтиәндәре тураһындағы был яңы хәстәрлегенә ысын күңелдән рәхмәт белдерәбеҙ.

Үҙған йыл беҙ урожайҙы күтәреүҙә ҙур уңыштарға ирештек. Беҙҙең хеҙмәтебеҙ юғары баһаланды, 17 кеше хөкүмәт ордендәре һәм медалдәре менән наградланды. Күптән түгел генә районның башҡа алдынғылары менән бергә беҙ ҙә ордендәр һәм медалдәр алдыҡ. Был беҙҙең тормошобоҙҙа иң ҡәҙерле һәм бәхетле көн.

Быйыл беҙ айырым звеноларҙа ғына түгел, ә бөтә 1100 гектар майҙанда һәр бер гектарҙан 120-шәр бот, ә 200 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр гектарынан 150-шәр бот урожай алыу бурысын ҡуйҙыҡ. Бойҙай сәсеү майҙанын үҙған йылға ҡарағанда 315 гектарға арттырабыҙ. Был бурысты үтәү өсөн беҙ бөтә сараларҙы күрәбеҙ. Ашламалар менән быйыл яҙ 300 гектар ужымды аҙыҡландырҙыҡ. Ужымдар тигеҙ һәм ҡуйы булып сыҡтылар. Хәҙер улар яҡшы булып үҫәләр. Колхозсылар ҙур күтәренкелек менән баҫыуҙа ярышып эшләйҙәр. Иртә культуралар сәсеүҙе 15 көндә сифатлы итеп тамамлау өсөн үҙ-ара ярышалар.

Дәүләкән районы «Бик-Ҡарамалы» колхозының ордендәр һәм медалдәр менән наградланыусылары исеменән:

Ғ. Әюпов, З. Юнусов, У. Нуриәхмәтов, Х. Нағаев, М. Ҡашапова, М. Фәйзуллина һәм башҡалар.

Яңы йөкләмәләр

— Большевиктар партияһының, Совет Хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең беҙҙең туралағы хәстәрлеге яңы еңеүҙәргә саҡыра. Беҙ элек бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан 20-шәр центнер урожай үҫтерергә йөкләмә ала инек. Хәҙер был аҙ, һис шикһеҙ, юғарыраҡ урожай алырға мөмкин, — тип сығыш яһаны Иглин районы «Новый путь» колхозының бригадиры иптәш Теплов. СССР Верховный Советы Президиумының Указын өйрәнеүгә арналған йыйылышта ҡатнашыусылар уның фекерен бергәм хупланылар.

— Указға яуап итеп, беҙҙең звено члендәре, — тине звеновод иптәш Кузнецова, — беркетелгән участкаһың һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай өсөн көрәшәләр. Ышаныс ҙур: ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды, һабан эшлығы иң ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп туңға һөрөлгән ерҙәргә генә сәселәсәк.

Эш менән яуап бирәләр

— Беҙҙең колхоздың члендәре, — ти Баҡалы районы Рокоссовский исемендәге колхоздың председателе иптәш Тарханов, — иле беҙҙең урожай мастерҙарына юғары исем биреү һәм уларҙы ордендәр, медалдәр менән наградлау тураһындағы яңы Указды ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар. Яңы Указға яуап итеп, беҙҙең колхозсыларыбыҙ социалистик йөкләмәләр алдылар. Иптәш Енейкина звеноһы 20 гектар майҙанда арыштың һәр гектарынан 25-әр центнер урожай алыу бурысын ҡуйҙы.

Рокоссовский исемендәге колхоз быйыл 786 гектар майҙанда иген сәсә. Был уның һуғышҡа тиклемге кимәленә етеүен күрһәтә. Колхозсылар яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн көрәште йәйелдерҙеләр.

СССР Верховный Советы Президиумының 24 апрель Указы Баҡалы районының башҡа колхоздарында ла игенселәрҙе батыр хеҙмәткә дәртләндерҙе.

Стахановсылар — почет таҡтаһына

ЧЕРНИКОВСК. Машиналар төҙөү заводында Май алды социалистик ярышында яҡшы өлгө күрһәтеүсе бригадаларҙы, сменаларҙы, айырым эшселәрҙе яҙыу өсөн почет таҡтаһы булдырылды.

Партбюро секретары иптәш Светлов булған цехтың Иванов етәкселегендәге группа коллективе апрель айы заданиеһен срогынан ике аҙнаға алда үтәне. Бригада члендәре — бөтәһе 17 кеше — производство еңеүҙәре өсөн почет таҡтаһына яҙылдылар.

Волков иптәш етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы көндәлек заданиеларҙы 160 — 180 процентҡа үтәй. Сашков иптәш етәкселек иткән бригада 1 Майға 5 йыллыҡ заданиене үтәй. Был алдынғы бригадалар һәм һәр көндә 3—4 норма биреүсе шлифовальщик Яковлев, слесарь Шахмаев, Дундуков иптәштәр шулай уҡ почет таҡтаһында урын алдылар.

М. Мостафин.

Старателдәрҙең производство бүләктәре

БАЙМАҠ. (Телеграф аша). Байҡара рудникенең «Совет армияһының 30 йыллығы» старателдәр артеле (председателе иптәш Ғүмәров) Май алды ярышына ҡушылып, апрель айы руда сығарыу планын 25 апрелгә үтәргә йөкләмә алғайны. Коллективтең биргән һүҙе эшенән айырылманы. Апрель планы срогынан алда, 131 процентҡа үтәлде. Забойщик Абзгилдин, Ҡолбасин руда сығарыу планын 174—175 процентҡа үтәп, ярышыусылар араһында алдынғы сафта баралар.

Матросов исемендәге старателдәр артеле члендәре лә Беренсе Май байрамын хеҙмәттә уңыштар менән ҡаршылай. Коллектив беренсе квартал планын 114 процентҡа үтәһә, апрель планы үтәлеше 120 процент тәшкил итә.

РСФСР Министрҙар Советендә

[illegible]

Урта мәктәптәр әргәһендә интернат- [illegible]

[illegible] ...са комплектовать итергә, 1948 йылдың 1 августына тиклем 44.370 уҡытыусы ебәрергә һәм йәйге осорҙа уҡытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү өсөн курстар үткәрергә тәҡдим ителде.

[illegible] Очаковскийҙағы кирбес заводында 1948 йылдың III кварталында кирбес һәм черепица эшләп сығарыу буйынса яңы ҡуҙәтерелә торған оборудование һыныу [illegible] ҡарау өсөн даими стенд төҙөлөп бөтәсәк.

[illegible] тураһында, 3 Үҙәк союзы — парник-теплица хужалығына кәрәк булған материалдарҙы [illegible] колхоздарға ебәреү тураһында күрһәтмә бирҙе.

Патриот

[illegible]

верстак эшләп, уны станоктар менән йыһазландырҙыҡ. Йыйҡау цехына слесарь итеп тәғәйенләнәләр үҙегеҙҙе, — тинеләр завод эшселәре.

Госпиталдән сығыу менән ул заводҡа килде. Уны хөрмәтләп ҡаршыланылар. Борис Алексан- [illegible]

[illegible] ҡайтты һәм уны намыҫ менән башҡара.

Һүрәттә: Өфө электротехник заводының стахановсы слесаре Борис Александрович Мошкин үҙенең эш урыны янында.

С. Мәүлютов тексы.
В. Жданов фотоһы.

Совет композиторҙарының беренсе Бөтә Союз съезы

Совет композиторҙарының беренсе Бөтә Союз съезы 25 апрелдә үҙенең эшен тамамланы. Етеккән дауам иткән съезда СССР-ҙың союзный, автономиялы республикалары һәм ҡалалары делегаттарының бик күп сығыштары тыңланды. Сығып һөйләүселәр ВКП(б) Үҙәк Комитетенең 10 февралдәге тарихи ҡарарының һәм музыка деятелдәренең ВКП(б) Үҙәк Комитетында булған кәңәшмәһендә А. А. Жданов сығышының совет музыкаль культураһының артабан үҫеше өсөн ҙур әһәмиәтлелеген бер күңелдән әйтеп үттеләр.

Партия һәм халыҡ талаптары менән ҡулланып, съезд совет композиторҙарының һәм музыковедтарҙың артабанғы эшмәкәрлегенең конкрет программаһын билдәләне, СССР композиторҙары союзының етәксе органдарын һайланы һәм уның уставын ҡабул итте.

Б. В. Асафьев һәм Т. Н. Хренников иптәштәрҙең докладтары һәм ҡушма докладтар буйынса ҡабул ителгән резолюцияларҙа совет музыкаль искусствоһының хәҙерге моментта уҙ үҫешенең һынылыш этабында тороуы билдәләнә.

Съезд үҙенең резолюцияһында союздың яңы правлениеһен иҫке етәкселектең хаталарын иҫәпкә алырға һәм композиторҙар союзының бөтә эшен ҡыҫҡа ваҡыт эсендә партия күрһәтмәләре нигеҙендә ҡайтанан ҡорорға мәжбүр итә.

Серек барыусы буржуаз идеологияның барлыҡ ҡалдыҡтарын тамырынан бөтерәп, совет композиторҙары һәм музыковедтәре юғары идеялылыҡ, большевистик партиялылыҡ, социалистик Тыуған ил интерестәренә үҙ-үҙҙәрен аямай патриотик хеҙмәт итеү принциптәренән сығып эш итергә тейештәр.

Съезд бөтә композиторҙарҙы халыҡ ижадының бик бай хазинаһын файҙаланыуға, Советтәр Союзындағы бөтә милләттәрҙең халыҡ йырҙарын тәрәнерәк өйрәнеүгә, халыҡ көйҙәрен ҡыйыуыраҡ һәм киңерәк файҙаланыуға, уларҙы юғары профессиональ оҫталыҡ менән байытыуға саҡырҙы.

Съезд совет эпохаһының бөйөклөгөн дөрөҫ һәм асыҡ итеп кәүҙәләндереүсе опералар тыуҙырыуҙы композиторҙарҙың беренсе нәүбәттәге ижади бурыстарының береһе итеп иҫәпләй.

Композиторҙар яңы опера әҫәрҙәре өҫтөндә эшләгәндә, бөтәһенән алда, йөкмәткенең тормошто дөрөҫ сағылдырыуы һәм байлығы, көйҙәрҙең матурлығы, форманың асыҡлығы, средстволарҙың төрлөлөгөнә ынтылырға тейештәр.

Симфоник жанрҙар өлкәһендә тар субъективизм һәм формалистик фекерләү черталарын ҡырҡа еңеп сығырға, көйҙәрҙең асыҡлығына, аңлайышлылығына, образдарҙың конкретлелегенә эйә булған программалы симфоник музыка үҫтереүгә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк.

Съезд хор музыкаһының ҙур формалары өҫтөндә эшләү менән бер рәттән композиторҙар массовый йырҙар ижад итергә, еңел популяр музыка булдырыуға бәйрҙәрсә һаңға һуҡмаусы ҡараштыр бөтерергә саҡырылғандар тип күрһәтте. Ҙур булмаған ҡыллы инструменттәр һәм инструменталь ансамблдәр өсөн, тынлы оркестрҙәр һәм халыҡ инструменттәре оркестрҙәре өсөн юғары сифатлы әҫәрҙәр тыуҙырылырға тейеш.

Музыковедтәр үҙҙәренең иғтибарҙарын марксистик-ленинсе музыкаль эстетика проблемаларын эшләүгә, СССР халыҡтары ижадын һәм рус классик музыкаһы традицияларын өйрәнеүгә, буржуаз декадентик музыкаға һәм буржуаз музыка белеменә ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барыуға туплаарға кәрәк. Совет музыкаль тәнҡиттә юғары партия принципиаллелеге, боевой публицистик рух тыуҙырырға кәрәк. Совет музыкаһының асыл ғилми тарихен булдырыу ваҡыты килеп етте.

Резолюцияла шулай уҡ музыкаль белем пропагандалауҙы яҡшыртыуға, дөйөм белем мәктәптәрендә махсус музыкаль белем һәм музыкаль тәрбиә биреүҙе ойоштороуға ҙур иғтибар бирелгән. Массовый музыкаль обществолар төҙөү бурысы ҡуйыла.

* * *

Съездың һуңғы ултырышында совет композиторҙары Союзының правлениеһына һәм ревизия комиссияһына һайлауҙар булды.

Правление составына бөтә союзный республикаларҙың күренекле композиторҙары һәм музыкаль деятелдәренән 51 кеше һайланды.

Ревизия комиссияһына 11 кеше һайланды.

Иптәш И. В. Сталинға ҡотлау ебәреү тураһындағы тәҡдимде съезд ҡатнашыусылар оҙаҡҡа һуҙылған көслө алҡыштар менән ҡаршы алдылар. Ҡотлау хаты тексын композитор К. Данькевич уҡый. Совет халҡының бөйөк юлбашсыһы данына залда тантаналы тауыштар оҙаҡ яңғырай.

Т. Н. Хренников совет композиторҙарының беренсе Бөтә Союз съезын ябыҡ тип иғлан итә.

Байраҡлы цех

БӘЛӘБӘЙ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Начальнигы коммунист Пронин булған механик цех коллективы машиналар төҙөү заводы цехтары араһында иң алдынғы сафта. Һәм ул заводтың күсмә Ҡыҙыл Байрағын өс ай рәттән инде үҙендә тотоп килә. Цех март айы планын 160 процентҡа, апрель айы планын срогынан 10 көн алда үтәне.

Байраҡлы цехтың намыҫлы хеҙмәттәре менән гүзәл эш өлгөләре биргән стахановсылары күп. Һәм улар завод коллективына өлгө булып торалар. Иптәш Васильев етәкселек иткән слесарҙар бригадаһы, прогрессивлар өлгөһендә эшләп, планды арттырып үтәй. Бригаданың алдынғы слесаре комсомолец Журбенко бер йыллыҡ эш нормаһын беренсе мартҡа үтәне. Ул хәҙер 1949 йыл иҫәбенә эшләй. Был бригаданың членадәре Валактионов һәм Ушаков иптәштәр һәр сменала ике ярым—өс норма бирәләр.

Начальнигы иптәш Антонов булған котельщиктәр цехы коллективы ла Май байрамын яңы производство еңеүҙәре менән билдәләй. Цехтың иптәш Скрабей етәкселек иткән бригадаһы апрель айында 15 урынына 20 автоцистерна эшләне.

Беренсе квартал планын 102 процентҡа үтәп, государствоға пландан тыш 38 мең һум файҙа биргән Бәләбәй машиналар төҙөү заводы байрамды апрель айы заданиеләрен үтәүҙә лә яҡшы күрһәткестәр менән ҡаршылай.

Г. Ғәйнетдинова.

Партия ойошмаларының социалистик ярышҡа етәкселеген яҡшыртырға

Өфө ҡалаһы промышленносеның алдынғы предприятиеләре Май алды социалистик ярышын киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә, темпты күтәрә баралар һәм продукция эшләп сығарыуҙы арттыралар. Ҡала промышленносе февраль айы планын 106 процентҡа үтәһә, мартта ул 112 процентҡа еткерелде. Тотош алғанда I квартал планы 106 процентҡа үтәлде.

Молотов районының предприятиеләре айырыуса яҡшы уңыштарға өлгәштеләр һәм март, апрель айҙарында ҡала райондары араһында социалистик ярышта беренсе урынды алдылар.

Бығаса тиклем артта ҡалып килеүсе эре предприятиеларҙан связь средствоһы предприятиеләре, телефон аппаратуралары заводтарының, текстиль комбинатының, төҙөлөш материалдары промышленносе предприятиеләренең үҙ эштәрен байтаҡ яҡшыртыуҙарын һәм программаны үтәй башлауҙарын билдәләмәй китеү мөмкин түгел. Паровоздар ремонтлау заводы ла март программаһын үтәй алды.

Хәҙер партия ойошмаларының бурысы эшселәрҙең, инженер-техник работниктарҙың хеҙмәт һәм политик күтәренкелегенә большевиктарса етәкселек итеүҙе көсәйтә барыуҙан, тағы ла яҡшыраҡ эшләү, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты срогынан алда үтәү өсөн үтәрҙы һәр бер предприятиеның иҫке мөмкинлектәрен тулыраҡ файҙаланыуға мобилизовать итеүҙән тора. Партия ойошмалары политик эште хужалыҡ эше менән дөрөҫ ярашытырып алып барып, социалистик ярышҡа етәкселекте тағы ла яҡшыртырға, уны асыл мәғәнәлә массовый итеп әүерелдереүгә өлгәшергә тейештәр.

Был йәһәттән агрегат заводы партия ойошмаһы өлгө була ала. Билдәле булғанынса, был заводтың коллективы Май алды социалистик ярыштың инициаторы булды. ВКП(б) Өлкә Комитете бюроһы, күптән түгел генә был партия ойошмаһының биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү буйынса эшен тикшереп, уның администрация өҫтөнән политик етәкселекте дөрөҫ тормошҡа ашырыуын, иҫке мөмкинлектәрҙе табыу һәм файҙаланыу буйынса ҙур эш башҡарыуын билдәләне. Агрегат заводы беренсе квартал планын 123 процентҡа үтәне һәм апрелдә был күрһәткестәрҙе уҙып китте.

Тау оборудованиеләре заводы партия ойошмаһының эш тәжрибәһе лә иғтибарға лайыҡлы. Ул социалистик ярышта алынған йөкләмәләрҙең үтәлешен тәьмин итеү өсөн конкрет һәм ғәмәли-эшлекле саралар күрә. Был башында ҡойоу цехында брак 32 процентҡа тиклем барып етә, механик, йыйыу һәм башҡа цехтарҙың эшен ауыр хәлгә ҡалдыра ине. Партбюро бракты килеп сығыу сәбәптәрен ентекләп өйрәнде, уныл был мәсьәләне үҙенең ултырышында тикшереп, конкрет ҡарар ҡабул итте һәм уның үтәлешенә көндәлек контроль булдырҙы. Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, партбюро был мәсьәләне ҡайтанан тикшерҙе. Бында цехҡа техник ярҙам күрһәтеү һәм партия-политик эште яҡшыртыу кәрәклеге асылды. Цехҡа инженер-техник работниктарҙан дүрт коммунист беркетелде. Улар ай буйына цех етәкселәренә етешһеҙлектәрҙе бөтереүҙә ярҙам иттеләр, камиллашкәнерәк технологияны теоретик яҡтан өйрәнеләр һәм практик рәүештә ҡулланыуға индерҙеләр. Һөҙөмтәлә, брак 11,5 процентҡа тиклем кәмене. Партия ойошмаһы хәҙер бракты бөтөнләй бөтөрәү өсөн ныҡышмалы көрәш алып бара.

Партияның район, өлкә һәм ҡала конференцияларынан һуң күпкенә партия ойошмалары социалистик ярышҡа яҡшыраҡ етәкселек итә башланылар. Был ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Шул уҡ ваҡытта, социалистик ярышҡа етәкселек эшендәге конференцияларҙа асылған етешһеҙлектәр һаман да бар әле һәм улар бик яй бөтөрәләләр. Күп предприятиеларҙа социалистик ярышты ойоштороуҙа формализм, штурмовщина йәшәп килә, цех, смена һәм бригадаларҙың эшенә оператив рәүештә йомғаҡ яһалмай, социалистик ярыш алдынғыларының эш методтары популярлаштырылмай. Район партия активтарының күптән түгел булып үткән йыйылыштарында конференция йомғаҡтарын тикшергәндә был етешһеҙлектәрҙең әле булһа бөтөрөлмәгәнлеге беленде.

Промышленностең беренсе квартал планын үтәмәүсе һәм һаман да артта ҡалыусы коопинсоюз, леспромсоюз, күн-аяҡ кейеме, аҙыҡ-түлек предприятиеләре шикелле тармаҡтарының ҡәнәғәтһеҙ итеп маҫлек насар эшләүҙәрен айырыуса билдәләргә кәрәк. Промышленностең был тармаҡтарындағы партия ойошмалары коллективтағы эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, Май алды социалистик ярышында алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшкә күтәрә алмаһылар.

Партия конференцияларының производство эшен тәрәнерәк һәм бөтә яҡлап иңеү, продукция эшләп сығарыуҙы һәм уның сифатын яҡшыртыу өсөн өҙлөкһөҙ көрәш алып барыу тураһындағы асыҡ күрһәтмәләренән бөтә партия ойошмалары ла үҙҙәренә дөрөҫ һығымта яһамайҙар әле. Мәҫәлән, Дим станцияһының паровоздар депоһы элеккеге кеүек уҡ ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүен дауам итә. Ремонт планын үтәп еткермәй. Депола паровоздар ремонтлағанда технология режиме һаҡланмай. Паровоз бригадалары паровоздарҙы һаҡлыҡ менән эшләтеү кәстәрлеген күрмәйҙәр. Бында ремонт эшенең сифаты өсөн ныҡлы көрәш алып барылмай, ремонт эшен үтәү срогы билдәләнгән ҡормалап ике тапҡырҙан да артып китә. Шулай була тороп, партия ойошмаһы (секретаре иптәш Семенов) был гүзәл торғоһоҙ хәлде бөтөрөү, бөтә коллективте, барыһынан да элек, коммунистарҙы күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе булдырмау, деповың эшен ҡырҡа яҡшыртыу өсөн көрәшкә күтәреү буйынса бер ниндәй ҙә эшләмәй.

Партия ойошмалары кешеләр араһында массовый-политик эште даими рәүештә алып барғанда ғына, ярыш алдынғыларының тәжрибәләрен бөтә яҡлап популярләштергәндә һәм уларҙы башҡаларға күсергәндә генә социалистик ярышты бөтә киңлеге менән йәйелдерергә һәм алынған йөкләмәләрҙең үтәлешенә өлгәшергә мөмкин. Бының өсөн политик-агитация һәм пропаганданың бөтә форма һәм методтарын — доклад, беседа, күргәҙмә агитация һәм стена газеталарын тулы файҙаланырға кәрәк. Был тәңгәлдә партия группалары мөһим урын тоталар. Сөнки улар производствоға яҡын торалар, план үтәлешен тәьмин итеүсе кешеләргә туранан-тура йоғонто яһайҙар. Шулай ҙа, күп урында партия группаларының эшенә тейешле иғтибар бирелмәй. Мәҫәлән, витамин һәм кабель заводтарында партия группалары социалистик ярышта алынған йөкләмәләрҙе үтәү, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу, коммунистарҙың һәм комсомолецтарҙың авангардлыҡ ролдәрен күтәреү кеүек мөһим мәсьәләләр менән шөғөлләнмәйҙәр. Сөнки партбюро партия группалары менән конкрет етәкселек итмәй, уларҙың эшенә юнәлеш бирмәй һәм практик ярҙам күрһәтмәй.

Беҙҙең заводтарыбыҙҙа юғары хеҙмәт күрһәткесенең бик яҡшы өлгөләрен биреүсе гүзәл стахановсылар бар. Судноларҙы ремонтлау заводының модельщигы коммунист В. Шеломенцев ай һайын икешәр норма үтәй. Ул ҡатмарлы деталдәр эшләүҙең технология процессын яҡшылап уйлай, чертеждарҙы үҙе эшләй, эш урынын алдан әҙерләп ҡуя, ваҡыттың бер генә минутын да бушҡа үткәрмәй. Телефон аппаратуралары заводының иптәш Чистов етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы үткән йылда үҙенең биш йыллыҡ планын үтәне. Был бригада членадәренән Дәүләткилдиев, Булгаков иптәштәр һәм Чистов үҙе көн һайын 3—4-әр норма бирәләр.

Ҡаланың предприятиеларында дүрт йыллыҡ норма үтәүсе 65 йәш эшсе бар, бер йыл эсендә 692 эшсе ике йыллыҡ норманы үтәне һәм 8 меңгә яҡын эшсе бер йыллыҡ нормаларын срогынан күп алда тултырҙы.

Был иптәштәрҙең өлгөһөндә күп эшселәрҙе өйрәтергә, уларҙы алдынғылар кимәленә күтәрергә мөмкин булыр ине. Ләкин партия ойошмалары был тәңгәлдә бик аҙ эшләйҙәр, социалистик ярышты йәйелдереүҙә мөһим урын тотоусы комсомол һәм профсоюз ойошмаларының иғтибарын да уға йүнәлтмәйҙәр.

Партияның өлкә конференцияһы партия ойошмаларынан социалистик ярышҡа етәкселекте яҡшыртыуҙы, производствоға алдынғы методтарҙы индереү буйынса эш алып барыуҙы һәм шул нигеҙҙә, биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүҙе тәьмин итеүҙе талап итте. Был мөһим бурысты уңышлы үтәүгә өлгәшеүҙең конкрет юлдары ла күрһәтелде. Конференцияның был күрһәтмәләрен ғәмәлдә рәүештә үтәү, партия-политик эште көсәйтеү юлы менән эшселәрҙә, инженер-техник работниктарҙа ярышта алынған йөкләмәләрҙең үтәлеше өсөн яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләү һәм ярыштың һөҙөмтәле булыуына өлгәшеү — хәҙерге көндә партия ойошмаларының иң мөһим бурыстарының береһе булып тора.

А. Чуватин.

ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты секретары.

Башҡортостан нефть промышленносендә механизациялаштырыу эштәре

Быйыл республиканың нефть промышленносендә скважиналарҙы бораулау һәм нефть сығарыу буйынса күп хеҙмәт талап ителгән процестәрҙе механизациялаштырыуҙа ҙур ғына эштәр үткәрелә.

Бораулау эшендә бораулау механизмдарын аҫҡа төшөрөү һәм күтәреү быға тиклем иңгеҙҙә ҡул көсө менән башҡарыла торғайны. Был, бораулаусының көм тигәндә 18—20 процент эш ваҡытын ала, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә ҡомасаулыҡ итә ине.

«Башнефть» берекмәһенең трестары һәм айырым бораулау конторалары быйыл алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеп, буровойҙарҙың бөтәһенә лә бәләкәй механизация индереүҙе тегәлләргә булдылар. Буровойҙа бәләкәй механизацияны тулыһынса файҙаланыу унда урынһыҙға көс һалыуҙы ес-дүрт тапҡырға ҡыҫҡарта.

«Туймазынефть» тресының күпселек буровойҙары хәҙерге көндә бәләкәй механизация оборудованиелары менән тулыһынса ҡоралландырылғандар. Иеҙҙәрсә эшселәр стахановсылар мәктәптәрендә, производство кәңәшмәләрендә буровойҙарҙы бәләкәй механизация менән киңәк тәьмин итеү һәм уны яҡшы файҙаланыу юлдарын өйрәнәләр.

Был мәсьәләлә эшселәргә нефтселәрҙең хеҙмәтен механизациялаштырыу һәм уны ойоштороу буйынса Үҙәк институттың Өфөләге филиалы ла ярҙамға килә. Филиалдың Октябрьск ҡалаһында, тәжрибәле бораулау мастеры иптәш Ф. А. Пронин етәкселегендә эшләгән инструктив бригадаһы буровойҙарға йөрөп һәм производство кәңәшмәләре аша эшселәргә бәләкәй механизмде ҡулланыу методтарын өйрәтә.

Бораулаусылар хәҙер бәләкәй механизмде киң ҡулланалар һәм яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшәләр.

Мәҫәлән, нефтселәрҙең хеҙмәтен механизациялаштырыу һәм ойоштороу буйынса үҙәк институттың («ЦИМТ нефтиҙән») Өфөләге филиалы тарафынан конструкциялаштырылған бер ябай инструментте—долотоларҙы һүтеп алыу таҡтаһын ҡулланыу эш ваҡытының файҙаһыҙға китеүен дүрт тапҡырға, бораулау торбаларын Залкин системаһындағы түңәрәк аҫҡыс менән һүтеп алыуҙы—ике тапҡырға ҡыҫҡарта.

Бораулау механизменең квадрат тап аталған ауыр өлөшөн шурфҡа автоматик тартып индереү ҡоралы (автозатаскиватель), бораулау торбаларын бер урындан икенсе урынға күсерә торған арба, лебедка барабанына металл арҡанды дөрөҫ урата торған ҡулайлаштырыу һәм башҡа механизмдар практикала ентекле рәүештә һынал дылар һәм яҡшы һөҙөмтәләр бирҙеләр.

Мастерҙар: Балабанов, Топчий, Алексеев, Ғабдуллин һәм башҡа стахановсыларҙың бригадалары квадратты шурфҡа автоматик тартып индереүҙе ҡулланыу арҡаһында ғына ла һәр бер скважинаға 10—12-шәр сәғәт эш ваҡытына экономия яһайҙар. Иптәш Топчий бригадаһы ағымдағы йылда бәләкәй механизмде ҡулланыу һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлеген 15 процентҡа күтәрҙе һәм производство планын систематик рәүештә үтәп бара.

«Туймазынефть» тресының алдынғы кешеләре өлгәһенә Ишембайҙа ла һәм башҡа урындарҙа ла киң ҡулланыу республикабыҙҙа булған бөтә буровойҙарҙы бәләкәй механизация менән ҡоралландырыу бурысын килтереп ҡуйҙы.

Ошо бурысты йылдам һәм уңышлыраҡ үтәү өҫтөндә хәҙер нефтселәр генә түгел, бәлки уларҙы оборудованиелар менән тәьмин итеүсе предприятиелар ҙа эшләйҙәр. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡтағы «Красный пролетарий» заводы нефтселәрҙең заказдары буйынса күп механизмдәр, шул иҫәптән Залкин системаһындағы аҫҡыстар, автозатаскивателдәр, балсыҡ шыйыҡсаһының һибелеүен туҡтата торған әйберҙәр, торбаларҙы йыуҙыра торған пульвизаторҙар һәм башҡа механизмдәр эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙе.

Быйыл нефть промыселдарендә нефть сығарыу эшендә лә механизмдарҙы күтәреү һәм төшөрөү буйынса күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу башлана. Быныңөсөн күренекле инженер Молчанов тарафынан уйлап сығарылған механизмдәр ҡулланыласаҡ.

Скважиналарҙың үҙәгенә парафин ҡатыуына ҡаршы электр тогын ҡулланыу (был беҙҙең нефтселәребеҙҙең ижады) быға тиклем эксперемент-тәжрибә рәүешендә генә алып барыла ине.

Пәк тейәү-бушатыу операцияларында һәм карьерҙарҙа, төҙөлөш объекттарында күп хеҙмәт талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу ҡиммәте быйыл ес тапҡырға арта. Ошо көндәрҙә «Башнефть» берекмәһенең трестары, промыселдәре, төҙөлөш контора лары байтаҡ һанда ҡеүәтле экскаваторҙар, автокрандар, йөктәрҙе бушатҡыстар, күсереп йөрәтелә торған стелаждар һәм башҡаларҙы аласаҡтар.

Уларҙың бөтәһе лә республиканың нефть промышленносендә күп хеҙмәт талап иткән эш процестәрең механизациялаштырыуҙа 1950 йылға билдәләнгән кимәлгә быйыл уҡ етерлек мөмкинлек бирә.

Хәҙер бурыс — механизациялаштырыу эшен бөтә саралар менән тиҙләтеүҙән, беренсе уңышын тарҙы нығытыуҙан һәм социалистик промышленностең был өлкәләге бөтә ҡаҙаныштарын тулы файҙаланыуҙан һәм шуның менән Тыуған илебеҙгә күберәк нефть биреү бурысын уңышлы үтәүҙән тора.

В. Рафиков.

Перфоратор эшләү үҙләштерелде

Нефть скважиналарын аттырыу юлы менән тикшереү өсөн ҡулланыла торған күп стволлы перфораторҙар элек сит илдән индерелә ине. 1947 йылдың аҙағында машиналар төҙөүселәр алдында күп стволлы перфораторҙар эшләп сығарыу бурысы ҡуйылды һәм

Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводы (директоры иптәш Посылкин) был ҡатмарлы ҡоралды эшләүгә башланы. Һынау өсөн яһалған ун стволлы тәүге перфораторҙар уңышлы булып сыҡты.

Ғ. Ибраһимов.

Республика баҫыуҙарында

Һайлап һөрөү һәм тырматыу башланды

АҠЪЯР. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Сталин исемендәге колхоз члендәре районда беренсе булып баҫыу эштәренә башланылар. Хәҙер иртәнән алып, кискә тиклем колхоз баҫыуҙарында ҡыҙыу эш бара.

Иптәш Хәким Юлдашбаев етәкселек иткән орлоксолоҡ звеноһы ҡар иреү башлау менән үҙ участкаларына ашламалар ташыуға башланы һәм мөмкинлек тыуыу менән уҡ 12 гектар майҙанда ужымды аҙыҡландырҙы.

Муса Кудабаев етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы өлгөргән участкаларҙы һайлап һөрөүгә һәм тырматыуға башланы.

Р. Шәфикова.

Тәүге көндә 31 гектар ер һөрөлдө

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районды 45 колхозында ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу киң йәйелдерелде. Бөтәһе 12 колхоз, шул иҫәптән «Аҙнагол» (председателе иптәш Харисов), «Үрнәк» (председателе иптәш Идиатуллин) һәм Тукай исемендәге колхоз (председателе иптәш Мохтаров) ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу планын арттырып үтәнеләр.

«Үрнәк», «Ыҡ», «Ярыш» һәм «Раевка» колхоздарында өлгөргән участкаларҙы һайлап һөрөү эше башланды. Тәүге көндә 31 гектар ер һөрөлдө. Һөрөүҙең сифатын тикшереү өсөн постар ойошторолдо.

Яҙғы сәсеү ваҡытында колхоздарға ярҙам күрһәтеү маҡсаты менән район һәм МТС агрономдарынан, партия һәм совет активтарынан 41 кеше ауылдарға ебәрелде.

Р. Камалов.

Һабансылар нормаларҙы арттырып үтәйҙәр

ҠАНДРА. (Телефон аша). «Яңы көс» колхозында сиҙәм күтәреү эштәре ҡыҙыу темп менән бара. Һабансылар эшкә башлауҙың тәүге көндәренән үк эш нормаларын үтәү, ерҙе яҡшы эшкәртеү өсөн үҙ-ара ярышҡа сыҡтылар. Иптәш Вәлиуллин Ғәбәйҙулла норма буйынса 0,50 гектар урынына, көн һайын 0,60 гектар ер һөрә. Ул 5 көн эсендә 3 гектар сиҙәм күтәрҙе.

Һабансыларҙан Зайнуллин Фәйзулла, Шәрифуллин Тимербулат иптәштәр ҙә юғары күрһәткестәргә өлгәштеләр. Улар үгеҙҙәр менән һәр көндә 0,45 гектар ер һөрәләр. 5 көн эсендә 2-шәр гектар сиҙәм күтәрҙеләр. Һөрөү иртәнге сәғәт 6-нан кискә 8-гә тиклем дауам итә. Ерҙе сей ҡалдырылмай бураҙналар тәрән.

«Яңы көс» колхозы аҙ ғына ваҡыт эсендә 15 гектар ер һөрҙе. Бик күп майҙанда ужым сәсеүлектәренә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙе.

«Урал» һәм «Өс йыйын» колхоздары ла сиҙәм һөрөүгә башланылар.

Районды колхоздары 1000 гектарҙан артыҡ майҙанда ужымдарҙы аҙыҡландырҙылар. «Трактор» һәм «Кандра» колхоздары планды арттырып үтәнеләр.

Ғ. Ғәзизуллина.

Сортлы, яҡшы орлоҡ үҫтереү өсөн

БАЙҠЫБАШ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районды орлоҡсолоҡ хужалығы булған «Мировой Октябрь» колхозы быйыл сортлы, яҡшы орлоҡ үҫтереү өсөн бөтә сараларҙы күрә.

Звенолар, урожайҙы күтәреүҙә мөһим сара булып торған ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң ҡулланалар. Валентина Бабушкина етәкселек иткән звено ике көн эсендә 30 гектар майҙанда аҙыҡландырыу үткәрҙе. Һәр бер гектарға икешәр центнер ҡош тиҙәге һәм 5-әр центнер көл һибелде.

Башҡа звенолар ҙа баҫыу эштә… рен ойошҡан рәүештә сыҡтылар. Колхозсылар ике-өс көн эсендә ужымдарҙы аҙыҡландырыу планын үтәнеләр һәм хәҙер планды арттырып үтәү өсөн көрәшәләр.

Бөш бригаданың бөтәһендә лә баҫыуҙарҙы күҙәтеү постары булдырылды.

Ғ. Исмәғилов.

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

Яҙғы сәсеүгә—юғары агротехника

Ауыл хужалығы йылының иң яуаплы осоро — яҙғы сәсеү килеп етте.

Башҡортостандың күп кенә колхоздарында баҫыу эштәре башланды. Иглин, Әбйәлил, Бүзәк районларының колхоздары күп йыллыҡ үлән сәсеү, ужымдарҙы һәм күп йыллыҡ үләндәрҙе тырматыу эштәрен алып баралар. Шишмә районында 1000 гектарға яҡын ужым сәсеүлектәре өҫтәмә аҙыҡландырылды. Яҡын көндәрҙә сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы яҙғы сәсеүе бөтә республикабыҙ буйынса массовый рәүештә йәйеләсәк.

Башҡортостан колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре быйыл сәсеү майҙандарын киңәйтеү, урожайлылыҡты күтәреү, ауыл хужалығы эштәре планын арттырып үтәү буйынса ҙур йөкләмәләр алдылар. Хәҙер ул йөкләмәләрҙе практик рәүештә тормошҡа ашырыу — яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү, юғары урожайға ышаныслы нигеҙ һалыу ваҡыты. Алда торған был бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн колхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм совхоздарҙа булған бөтә ресурстарҙы файҙаланырға, бөтәһенән дә тарҙы яҙғы сәсеүҙең агротехник кимәлен күтәрергә кәрәк.

Быйылғы яҙғы сәсеү үткән йылға ҡарағанда байтаҡ үҙенсәлекле. Иң ҙур үҙенсәлек — ул яҙҙың иртә килеүе. Быйыл яҙ ерҙең һалҡын көндәрҙән бөтөү менән, баҫыуҙа һыуыҡтар

ҫыу эштәрен йәйелдереү өсөн тупраҡ бик тиҙ өлгөрөп етә. Икенсе үҙенсәлек — иртә бөртөклө ашлыҡ сәсеү майҙаны быйыл бик ныҡ артта. Ағымдағы йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының майҙаны, 1947 йылға ҡарағанда, 47,5 процентҡа күберәк булырға тейеш. Шуның менән бергә был эштәрҙе, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ ҡыҫҡараҡ срокта үткәреү талап ителә.

Был хәл, беренсенән, баҫыу эштәрен үткәреүҙә юғары ойошҡанлыҡты, икенсенән, яҙғы сәсеү агротехникаһына үҙенсәлекле яҡын килеүҙе талап итә. Һөҙөмтә шул: баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәрергә кәрәк, шул саҡта ғына яҙғы сәсеүҙең уңышлы хәл ителәсәк.

Бөтә көс быға ошо талаптарҙы үтәүгә йүнәлтелгән булырға тейеш. Баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә ҡуҙғала алмаусылыҡҡа юл ҡуйырға ярамай, өлгөргән һәр бер участка эшкәртелергә һәм сәселергә тейеш.

Яҙғы сәсеүҙә агротехника мәсьәләләрен хәл иткәндә иң беренсе нәүбәттә иғтибар ерҙә күберәк дым һаҡлауға, эш төрҙәре буйынса сроктарҙы дөрөҫ билдәләүгә йүнәлтелергә тейеш. Ошо маҡсатта тунға һөрөлгән ерҙәрҙе 2—3 көн эсендә тырматырға, яҙғы һөрөү менән тырматыу араһында өҙеклек тыуҙырмаҫҡа, сәсеү артынан уҡ тупраҡты тығыҙлатыу сараларын күрергә кәрәк. Яҙғы бойҙай тик тунға һөрөлгән ерҙәргә генә сәселергә тейеш. Быныңөсөн тупраҡ өлгөрөү менән уны эшкәртергә һәм шунда уҡ сәсеү үткәрергә кәрәк.

Иәвле тартыу көстәренең мөмкин тиклем күберәк өлөшөн яҙғы һөрөүгә ҡуйырға кәрәк. Иң тәүлә ҡара-ҡура, сиҙәм һәм күп йыллыҡ үлән сәселгән ерҙәрҙе һөрөү талап ителә, сөнки улар ҙа яҙғы бойҙай өсөн файҙаланыласаҡтар. Был майҙандар һөрөлөү менән тырматылырға һәм сәселергә тейеш.

Сәсеү алдынан тупраҡты әҙерләү сифатына айырыуса ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк. Тунға һөрөлгән ерҙәрҙе иртә яҙ тырматыуҙан һуң, культивациялау һәм бер үк ваҡытта тырматыу талап ителә, сиҙәм һәм ҡара-ҡура ерҙәр, көҙмә, яҙмы һөрөлөүенә ҡарамаҫтан, сәсеү алдынан дискалы тырмалар һәм лущильниктәр менән эшкәртелә һәм бер үк ваҡытта тырматыла.

Яҙ һөрөлә торған майҙандарҙы һөрөү алдынан сүп-сарҙарҙан таҙартырға кәрәк. Һөрөү тәрәнлеге 20—21 сантиметрҙан да кәм булмаһын. Сей ҡалдырыуға бер генә урында ла юл ҡуйырға ярамай, сазған баштары айырым рәүештә эшкәртелергә тейеш.

Сиҙәм, ҡара-ҡура, күп йыллыҡ үлән ерҙәрен, ҡағиҙә рәүешендә, предплужникле трактор һабандары менән һөрөргә кәрәк. Һөрөүҙең яҡшы сифатлы булыуын тәьмин итеү маҡсатында һабандарҙың тәҙек булыуына һәм уларҙы дөрөҫ көйләүгә айырыуса иғтибар бирелһен.

Сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү, юғары сифатлы орлоҡ сәсеү, нормаларҙы урынлы ҡулланыу һәм орлоҡтарҙы дөрөҫ күмдереү — юғары урожай өсөн көрәштең уңышын хәл итеүҙә мөһим шарттар.

Иртә срокта беренсе нәүбәттә яҙғы бойҙай сәселергә тейеш. Һуңға ҡалыу — урожайҙы ныҡ түбәнәйтә. Бөтә эш был ҡиммәтле культураны 6—8 эш көнөндә сәсеп бөтөрләк итеп ойошторолорға тейеш. Шул уҡ ваҡытта башҡа культураларҙы ла агротехник сроктарҙа сәсеп бөтөрөү өсөн саралар күрергә кәрәк. Күп йыллыҡ үлән һәм кенбағыш культураларын ваҡытында сәсеүгә айырыуса ныҡлы иғтибар бирелһен. Ужымлар өҫтөнә күп йыллыҡ үләндәр сәсеүҙе ҡар иреп бөтөү менән үткәрергә кәрәк.

Сәсеү орлоҡтары сығыш яғынан да, таҙалыҡ яғынан да кондицияға еткерелергә тейеш. Сығышы түбән булған орлоҡтарҙы ҡояшта йылытып тулы кондицияға еткерергә мөмкин. Был методты киң ҡулланырға кәрәк. Орлоҡтарҙы ағыулау һәм яровойлаштырып сәсеү шулай уҡ юғары урожай өсөн көрәштең мөһим саралары.

Бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығын күтәреүҙә дөрөҫ сәсеү нормаларын ҡулланыу ҙур роль уйнай. Был эштә шаблон булырға тейеш түгел, урындағы шарттарҙы, орлоҡ сифатын бөтә яҡлап иҫкә алырға һәм шунан сығып сәсеү нормаларын ҡулланырға кәрәк. Бер генә урында ла сәсеү нормаларын кәметеүгә юл ҡуйылмаһын. Сәсеү орлоҡтарын әрәм-шәрәм итеүселәр ҡаты яуапҡа тартылырға тейеш.

Үткән йыл күп кенә райондарҙа сәскестәрҙе файҙаланыу баһаланманы, ҡул менән сәсеүгә юл ҡуйылды. Был — ҙур хата, агротехниканы тупаҫ боҙоу, ул урожайҙы кәметеүгә килтерә. Теҙмә юл менән сәсеү орлоҡтарҙы тигеҙ урынлаштырыуҙы, дөрөҫ күмдереүҙе һәм экономлы расходлауҙы тәьмин итә. Тартыу көстәре йәки сәскестәрҙең етешмәүенә һылтаныу — улар бөтәһе лә нигеҙһеҙ. Бында тик баҫыу эштәрен дөрөҫ ойоштора ғына белергә кәрәк.

Үткән йыл арҡылы-буй сәсеү ысулын ҡулланып, алдынғы колхоздар юғары урожай алдылар. Бурыс—был ысулды киңерәк һәм ҡыйыуыраҡ ҡулланыуҙан тора.

Ашлыҡ культураларын сәсеү әйләнешендә дөрөҫ урынлаштырыу— мөһим мәсьәлә. СССР Министрҙар Советының күрһәтмәләре нигеҙендә бөтә яҙғы бойҙай пар һәм тунға һөрөлгән участкаларҙа, күп йыллыҡ үлән, сиҙәм һәм ҡара-ҡура ерҙәрҙә сәселергә тейеш.

Яҙғы осорҙоң агротехник сараларынан ужым сәсеүлектәрен тәрбиәләү — өҫтәмә аҙыҡландырыу һәм тырматыу юғары урожай өсөн көрәштә ҙур әһәмиәткә эйә. Был саралар техник яҡтан ҡатмарлы түгелдәр, күп көс һалыуҙы ла талап итмәйҙәр, ә шул уҡ ваҡытта бик файҙалылар. Шулай булғас, был эште мөмкин тиклем киңерәк йәйелдерергә, аҙыҡландырыу һәм тырматыу планының һәр бер колхоз тарафынан тулыһынса үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк. Үкенескә ҡаршы, Туймазы, Саҡмағош, Ауырғазы һәм күп кенә башҡа райондар государство әһәмиәтендәге был эште баһаламайҙар һәм ваҡытты бушҡа үткәрмәйенсә уны йәйелдереү өсөн саралар күрмәйҙәр.

Тупраҡ өлгөрөү менән иң ҡыҫҡа срокта, 3—4 көн эсендә, ужымдарҙы тырматыу эшен ойошторорға кәрәк. Һуңға ҡалыу зарарлы, ул урожайҙы кәметеүгә килтерә. Был мөһим эште тиҙ һәм ойошҡан рәүештә үткәреү өсөн етерлек тиклем тартыу көстәре, талап ителһә, тракторҙар бүлергә кәрәк.

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреүҙә баҫыу эштәренең сифаты өҫтөнән дөрөҫ контроль булдырыу ҙур роль уйнай. Район ауыл хужалығы бүлектәренең баш агрономдары — трактор эштәре сифаты өҫтөнән государство инспекторҙары сәсеү осоронда иң яуаплы участкаларҙа булырға, бөтә эштәрҙең сифатын ныҡлы тикшерергә, насар эшкәртелгән ерҙәрҙе ҡабатлап эшкәртеү өсөн үҙ ваҡытында саралар күрергә бурыслылар. Был эшкә бөтә агрономдарҙы, агротехниктәрҙе йәлеп итергә кәрәк.

Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү бөтә ауыл хужалығы работниктәренең, партия, совет, комсомол ойошмаларының мөһим бурысы. Бөтә көс — баҫыуҙарға! Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреп, 1948 йылдың урожайына ышаныслы нигеҙ һалайыҡ.

Ш. Гайсин,
ВКП(б) Өлкә Комитеты ауыл хужалығы бүлеге мөдиренең урынбаҫары.

А. Веретенников,
БАССР Ауыл хужалығы Министрлығының баш агрономы.

ПРИНОСИМ СВОИ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

...телеграммалар

...рацияһының Франция ...нсе май айканлы ...ғәте

...хеҙмәт хаҡын һис кисекмәҫтән 20 процентҡа арттырыу өсөн, йәшәү минимумына ярашлы рәүештә хеҙмәт хаҡын автоматик рәүештә ҡайтанан ҡарау юлы менән һатып алыу һәләтлеген гарантиялау өсөн, хеҙмәт хаҡтарын, һис кисекмәҫтән, ҡайтанан ҡарау өсөн демонстрациялар үткәрергә тейешһегеҙ. 1 майҙа һеҙ беҙҙең милли суверенитетебеҙҙе империалистик хакимлек планы булып тороусы Маршалл планына ҡаршы беҙҙең промышленносебеҙҙе һәм ауыл хужалығыбыҙҙы һаҡлауға булған ынтылышыбыҙҙы ҡайтанан әйтергә тейешһегеҙ. Һеҙ үҙегеҙҙең халыҡтарҙың мохтажлыҡтары бынан башҡа ла бик ҙур булған саҡта яңы эшһеҙҙәр армияһы булмауға юл ҡуймаҫлығыбыҙ тураһында белдерергә тейешһегеҙ».

ВКТ хеҙмәтсәндәрҙе испан республиканецтарына һәм көрәшеүсе грек халҡына үҙегеҙҙең ярҙамығыҙҙы демонстрацияларҙа саҡыра.

Һөрәжәтләү һүҙе итеп мөрәжәғәттә түбәндәгеләр әйтелә:

«Һеҙ 1 майҙы эшселәр синыфы берҙәмлегенең бөйөк көненә әйләндерергә тейешһегеҙ. Һеҙ 71 миллион ағзаны берләштереүсе һәм бөтә донъя хеҙмәтсәндәре менән тығыҙ бәйләнештә тороусы профсоюздарҙың Бөтә донъя федерацияһы лозунглары астында демонстрациялар үткәрергә тейешһегеҙ. Йәшәһен 1 май — тыныслыҡ, икмәк, азатлыҡ һәм бәйһеҙлек... өсөн көрәш көне! Йәшәһен ВКТ! Йәшәһен профсоюздарҙың Бөтә донъя федерацияһы!»

...ы Төркиәлә таратылған ...әр тураһында

...аналы. Лакин был шау-шыуҙар ҙур ...урлыҡ менән бөттө. 24 апрелдә «Улус» газетаһы Мрамор диңгеҙендә йөк тейәгәндә ҡулланыла торған ине ҙур караптың йөҙөп йөрөгәндеге белендә, тигән хәбәрҙе баҫып сығарҙы.

...рламентендә

...се эшләй торған предприятиеларҙе национализациялау тураһындағы закон проектын парламентҡа тикшерергә тапшырҙы. Был закон проектын ашығыс рәүештә тикшерергә ҡарар ителде.

...ратик фронты яҡлы ...әҙәрләнеүе

...компартия эшенә законһыҙ рәүештә тығылыу ваҡиғалары булды: полицейскийҙар партия йыйылыштарын ҡыуҙылар, компартия ойошмаларында тентеүҙәр үткәрҙеләр, ағзаларҙы туҡмаһылар һәм башбаштаҡлыҡ менән ҡулға алдылар.

Христиан демократтары урындағы муниципаль органдарҙан халыҡ демократик фронт яҡлы бөтә кешеләрҙе алырға ынтылышмалы рәүештә тырышалар.

Дюмдәге йәшелсәселек — һөтсөлөк совхозы теплицаһында ҡыяр, һуған, салат һәм редискәләр күҙеп йәшелсәләр өлгөрҙөләр.

Һүрәттә: Совхоздың баҡсасыһы иптәш Т. А. Евграфова 1 Май байрамына ҡарата йәшелсәләр йыйнай.

Л. Яҡубов фотоһы.

Байрам концерттәре

Черниковск ҡалаһы машиналар төҙөү заводының «Ударник» клубы эргәһендәге художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәктәре 1 Май байрамын ҙур әҙерлек менән ҡаршы алалар. Улар яңы программалы концерттар әҙерләйҙәр.

30 апрелдә ҡаланың партия, совет, комсомол, профсоюз ойошмаларының һәм хеҙмәтсәндәренең 1 Майға арналған тантаналы йыйылыштарында илле кешеле рус инструменттәре оркестре, 45 кешеле рус хоры, 40 кешеле башҡорт бейеүҙәре һәм йырҙары ансамбле сығыш яһаясаҡ.

Байрам көндәренең беренсеһендә рус драма коллективы кәсә менән Б. Горбатовтың «Аталарҙың йәшлеге» тигән пьесаһы күрһәтеләсәк.

1 Май көндә «Ударник» клубында балалар иртәһе үткәреләсәк. Бында уларҙың үҙешмәкәрлек коллективтары яҡшы әҙерләнгән концерттар бирәсәктәр.

Машиналар төҙөү заводының икенсе площадкаһында иптәш Соколов етәкселегендә ойошторолған үҙешмәкәрлек түңәрәктәре, эшселәрҙең цех йыйылыштарын һәм ҡала демонстрацияһын хеҙмәтләндерәсәк.

М. Мостафин.

Үҙешмәкәрлек художество түңәрәктәре

Ишембай ҡалаһының Киров исемендәге клуб ҡаршыһында нефтселәрҙе культуралы хеҙмәтләндереү өсөн рус, башҡорт һәм татар үҙешмәкәрлек художество түңәрәктәре ойошторолдо. Рус драмколлективы тарафынан ҡуйылған «Факир на час» пьесаһын һәм башҡорт, татар коллективының башҡорт халыҡ йырҙары һәм бейеүҙәре башҡарыуҙарын тамашасылар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар.

Клуб ҡаршыһында шулай уҡ агитбригада ойошторолдо. Агитбригада беренсе тапҡыр Кинйәбулат нефть промыселе нефтселәре өсөн халыҡ-ара хәл тураһында лекция ойошторҙо, концерт бирҙе.

Ғ. Ғәлиев.

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы — Беренсе Майға арналған дөйөм ҡала демонстрацияһы

ПЛАНЫ

Халыҡ-ара байрам — 1948 йылдың Беренсе Май көнөндә ҡалаһының бөтә хеҙмәтсәндәре менән демонстрацияһы үткәрелә.

Өфө ҡалаһының эшселәре, ... маткәрҙәре, совет интеллигенцияһы, юғары уҡыу йорттарының студенттәре, мәктәп һәм ... уҡыусыларҙы ... ҡала демонстрацияһында ... шыу өсөн ... учреждениеларына, ... уҡыу йорттарына йыйыла... унан иртәнге 10 сәғәт 30 минутта район йыйылыу пункттарына баралар.

Ҡаланың бөтә ҡалған халҡы дөйөм ҡала демонстрацияһында ҡатнашыу өсөн иртәнге 10 сәғәт 30 минутта район йыйылыу пункттарына киләләр.

Тулы булмаған урта һәм урта мәктәптәрҙең 5—10 класс уҡыусылары бөтәһе дөйөм ҡала демонстрацияһының төшкә ... итәләр.

Район йыйылыу пункттары түбәндәгесә билдәләнә:

Молотов районы Пушкин урамынан башлап Сталин урамына табан Карл Маркс урамына тиклем теҙелә.

Ленин районы Карл Маркс урамынан башлап Аксаков урамына табан Сталин урамына теҙелә.

Киров районы Карл Маркс урамынан башлап Ленин урамына табан Сталин урамына теҙелә.

Жданов районы Карл Маркс урамынан башлап иҫке заводҡа табан Пушкин урамына теҙелә.

5—10 класс уҡыусылары һәм мәктәп йәшендәге, шулай уҡ автомашиналарҙа мәктәпкә тиклемге йәштәге балаларҙың дөйөм ҡала колоннаһы Пушкин урамынан башлап Сталин урамына табан Ленин урамына теҙелә.

Демонстранттар колонналарының хәрәкәт итеү тәртибе түбәндәгесә билдәләнә: демонстрация 5—10 класс уҡыусыларының хәрәкәте менән башлана (колонна етәксеһе иптәш Иегруль). Молотов районы колоннаһы (етәксеһе иптәш Мамыкин). Ленин районы колоннаһы (етәксеһе иптәш Гужва...). Жданов районы колоннаһы (етәксеһе иптәш Тляков). Киров районы колоннаһы (етәксеһе иптәш Чистяков). Колоннала һәр бер рәткә 8-әр кешенән теҙелеү тәртибе билдәләнә.

Дөйөм ҡала демонстрацияһы көндөҙгө 11 сәғәттә башлана. Хөкүмәт трибунаһына махсус пропускалар буйынса инеү иртәнге 10 сәғәт 30 минутҡа тиклем бара, унан һуң инеү туҡтатыласаҡ.

Пушкин урамы буйынса автомашиналар йөрөшө махсус пропускалар менән бары тик Фрунзе һәм Совет урамдары яғынан ғына рөхсәт ителә.

Пушкин урамы һәм уға сыҡҡан булған Ленин, Совет, Цюрупа, Герой Седовсылар урамдары буйынса 10 сәғәт 45 минуттан алып һәр төрлө хәрәкәт туҡтатыла.

Демонстрация менән дөйөм етәкселек итеү эске эштәр министре урынбаҫары полковник иптәш Ивановҡа йөкмәтелә.

Беренсе Май байрамын үткәреү буйынса ҡала комиссияһы.

Навигация башланды

Башҡортостан йылғаларында навигация башланды. Бөгөн, 29 апрелдә, «Октябрь революцияһы» затонынан Барнаул исемле яңы буксир пароходы Ҡариҙел йылғаһы буйлап Усть — Байкы пристаненә китте. Пароход Усть—Байкы пристаненән игеп тейәп Өфөгә ҡайтасаҡ.

Шул уҡ көндө пассажирҙар йөрөтөүсе пароход «Шаймуратов» Табын пристаненә, буксир пароходы «Бирск» Сим йылғаһы тамағына оҙатылды.

Яуаплы редактор:

Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — «ПӘШЛЕК МЕНӘН ОСРАШЫУ».

Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «ӨСӨНСӨ УДАР».

«Салауатта» — «ОКРАИНАНАН КИЛГӘН МАЛАЙ».

Матросов исемендәге кинола — «РЯДОВОЙ АЛЕКСАНДР МАТРОСОВ».

...профсоюздарҙың Бөтә донъя федерацияһының башҡарма бюроһы һәм башҡарма комитете сессияһы эшендә ҡатнашыу өсөн совет профсоюздары делегацияһы 1948 йылдың 27 апрелендә Мәскәүҙән Римгә китте.

Делегация составында ВЦСПС председателе В. В. Кузнецов (делегация етәксеһе) һәм делегация ағзалары Е. Я. Сидоренко, Н. В. Попова, С. Н. Ростовский һәм Д. Д. Монин иптәштәр инә.

(ТАСС).

...ғы яраланған.

18 апрелдән һуң илдең көньяҡ провинцияларында коммунистарға һәм социалистарға террор яһау һәм уларға ҡаршы ҡотортоу кампанияһы башланды. Полицияның...

Бер агрегатта

Ул башта завод-фабрикалар тураһында газеталар аша ғына белә ине. Илебеҙҙең һәр мөйөшөндә барған ҡеслә индустрия шауы, социалистик ярыш тулҡыны, завод-фабрикаларҙа үҫеп сыҡҡан хеҙмәт батырҙарының маҡтаулы исемдәре рухландыра ине уны.

— Газеталарҙа завод-фабрикаларҙы күрәм. Ҡат-ҡатлы аҡ корпустарҙың торбаларынан төтөндәр сығып торалар. Шуларға ҡарайым да, эх, шундай завод йәки фабрикаларҙың береһендә эшсе булһаң ине тип хыяллана торғайным, — ти Фатима, үҙенең ауылда торған саҡтарын хәтерләп.

Бер көн ул ысынлап та ошо теләктең тап үҙе менән осраша. Һуңғы почта менән килеп төшкән газетанан Өфөләге 8 март исемендәге тегеү фабрикаһына яңы набор булыуы тураһында уҡый һәм ашыға-ашыға ауыл Советына килә:

— Мин Өфөгә, фабрикаға китәм, удостоверение яҙып бирегеҙ, — ти. Уның был теләгенә ҡаршы килмәйҙәр. Күптән бирле күңелде борсоп йөрөгән хыялдар шул көндән башлап ысынға әйләнәләр.

1931 йылдың йомшаҡ елле июль иртәһендә Кушнаренко районы, Иҫке Уҫман ауылының ос ҡыҙы беренсе башлап фабрика ишектәрен асып инде. Эшсе булдылар.

Башта уларҙы «өйрәнсектәр» тип йөрөттөләр. Ҙур стажлы, квалификациялы эшселәр араһында һәр бер бәләкәй генә эш тә улар өсөн киләсәккә имтихан биреү булып торҙо. Улар башта «ваҡ-төйәк» киҫәктәрҙән ҡатын-ҡыҙҙар күлдәгенең айырым өлөштәрен тегергә өйрәнделәр. Ләкин бындай «ваҡ-төйәктәр» менән оҙаҡ маташырға тура килмәне уларға. Бер айҙан һуң уларҙы машинаға ултырттылар. План һәм нормаға күстеләр. Әле июнь айҙарында ғына «өйрәнсек» тип йөрөтөлгән ҡыҙҙар Октябрь алды ярышында алдынғы эшселәр сафына баҫтылар, байрам хөрмәтенә тәүге еңеүҙәр һәм беренсе бүләк улар ҡулында булды.

Фатиманың үҙ эшен яратыуын, белергә, өйрәнергә булған һәр бер яңы ынтылышын фабриканың етәкселәре һәр ваҡыт хуплап ҡаршыланылар, ярҙам иттеләр. Уны ике йыллыҡ инструкторҙар әҙерләү курсында уҡыттылар. Курсты тамамлағас Фатима Ҡазандағы фабрикаларға экскурсияға китте, алдынғы эш методтарын өйрәнде. Курстан ҡайтҡас уны инструкторлыҡҡа үрләттеләр, 40 кешенән торған агрегат уның ҡарамағына тапшырылды. Был социалистик производствола кешенең үҫешенә, алға ҡыйыу ынтылышына, ижади инициативаһына киң юл асыу ине. Ул етәкселек иткән агрегатта производство планының үтәлеше һәр ай һайын 120—150 проценттан түбән төшмәне. Агрегаттың һәр ваҡыт бүләкләнеп тороуы ғәҙәткә инеп китте.

Бынан ике йыл элек балалар йортонан 22 бала фабрикаға килеп инде. Фатима уларҙан айырым агрегат ойошторҙо. Үҙенең эш методтарын, бай тәжрибәләрен уларға күсерҙе. Йәштәр араһында алып барылған ынтылышмалы һәм сыҙамлы эш үҙенең емешен бирҙе. Агрегатта йәш эшселәрҙән Әлмөхәмәтова, Кукушкина һәм Сәлихавалар сталинсе яңы биш йыллыҡтың тәүге ҡарлуғастары булып һаналалар. Уларҙың производство күрһәткестәре айҙан-айға үҫә, күтәрелә. Ағымдағы йылдың беренсе кварталында план үтәлеше 150—160 процент тәшкил итте. Үткән бишйыллыҡтар осоронда үҫеп сыҡҡан оло апаларының хеҙмәт традициялары биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү буйынса уларҙы батыр хеҙмәткә рухландыра.

Кешеләр үҫәләр. Кешеләр үҫкән һайын агрегатта эш методтары ла үҙгәрә. Кисәге метод һәм нормаларға улар бөгөн һыйыша алмайҙар. Үҙ кисәгенә ышаныу, кисәгегә ҡарағанда бөгөн яҡшы эшләү, ә иртәгә тағы ла яҡшыраҡ эшләү теләге—совет кешеләренә генә хас булған сифаттар улар һәм уның хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт, совет патриотизмы тулы сағыла.

Агрегатта Советтар Союзындағы алдынғы эшселәрҙең яңы методтарын ҡыйыу ҡулланыуҙарын күреп була. Бында бөтә эшселәрҙе алдынғылар менән тиңләштереү, һәр бер цехта стахановсы эш методтарын индереү тураһындағы атаҡлы закройщик Василий Матросовтың, күп станоклы хеҙмәтләндереү хәрәкәтен йәйелдереү буйынса туҡыусы Волкова методы ла һәм эш сифатын яҡшыртыу, бракҡа ҡаршы көрәшеү буйынса Мәскәү тегеү фабрикаһы мастеры Суховерхова методы ла практик рәүештә күҙгә бәрелеп тора. Агрегаттың йәш эшселәре был методтарҙың бөтәһен дә үҙҙәренең көндәлек практик эштәрендә ҡыйыу рәүештә ҡулланалар.

Фасондар тегеү өсөн ҡулланыла торған махсус машинаны элек агрегаттан агрегатҡа күсереп йөрөткәндәр. Был күп кенә эш сәғәтен юғалтыуға, производство нормаһының үтәлешен түбәнәйтеүгә сәбәп булған. Фатима был турала һәр яҡлап фекер йөрөткәндән һуң машинаны бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөтеүҙе яраҡһыҙ тип тапты. Махсус машинаны файҙаланыу буйынса рационализаторлыҡ тәҡдимде индерҙе. Һөҙөмтәлә агрегат үҙендә булған эшсе көстәрҙе дөрөҫ урынлаштырыу, эш сәғәтен тығыҙландырыу, бош тороуҙарҙы бөтөрөүгә, үҙ звеноһынан ике кешене башҡа эшкә бушатыуға иреште. Ә элек бер генә оборот яһап килгән Әлмөхәмәтова бер үҙе ике оборотты хеҙмәтләндереүгә күсте һәм бер эшсене икенсе эшкә ҡуйырға бушлыҡ итте. Мастер Суховерхова методының нигеҙендә: продукцияның сифаты өсөн көрәш, цехтарҙа, агрегаттарҙа һәм айырым звеноларҙа эштә үҙ-ара контроль яһау мәсьәләһе ята. Агрегат ағзалары был методты ла киң менән күтәреп алдылар һәм уңышлы файҙаланалар.

Продукцияның сифат күрһәткесе өсөн көрәш һәр кемдең намыҫ эшенә әйләнде. Агрегатта биш кешенән торған сифат контроле үҙ-ара ярышыусы звеноларҙың эш сифаттарына тикшереү үткәреп, һөҙөмтәһен коллектив ағзаларына еткереп тора. Агрегат һәм звенолар араһында төҙөлгән социалистик ярыш договорҙарында бракҡа ҡаршы көрәш айырыуса әһәмиәтле кеҫкә инде. Һөҙөмтәлә ағымдағы йылдың февраль, март айҙарында агрегатта брак уртаса 20 процентҡа кәмене.

Фатима 8 март исемендәге фабрикала үҫте, эшкә оҫтарҙы һәм үҙе лә бик күптәрҙе тәрбиәләп үҫтерҙе. Тырыш һәм намыҫлы хеҙмәт, үҙенә талапсанлыҡ, ирешелгән уңыштар менән тынысланып ҡалыуҙы белмәү уның исемен фабриканың үҙ эсендә генә ҡалдырмаһы, халыҡҡа еткерҙе. Халыҡ уның Ватан алдында күрһәткән ошо патриотик хеҙмәтен юғары баһаланы — БАССР парламентына депутат итеп һайланы. Намыҫлы хеҙмәт уның юлын данға ҡумды. Государство деятеле дәрәжәһенә күтәрелгән Фатима Мөхтәсип ҡыҙы Басырова етәкселек иткән агрегат биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү юлынан алға бара.

М. Тажи.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙаре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00138 Өлкә газета-журналдар типографияһы. А. — 2 Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советe һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советe органы

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 87

1 Май шәмбе

хаҡы 20 тин

Йәшәһен 1 Май — бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнө! Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә, коммунизмдең еңеүенә табан алға!

Беренсе Май

Май — бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнө. Бөгөн бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре ҡеүәтле колонналарҙа ҡыҙыл байраҡтар менән демонстрацияларға сығалар. Уларҙың байраҡтарына:

«Йәшәһен мыҡлы тыныслыҡ-өсөн көрәшеүсе халыҡтарҙың дуҫлығы һәм хеҙмәттәшлеге!» тип яҙылған.

Бөгөн совет халҡы Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә илебеҙҙә коммунизм төҙөү өсөн, Ватаныбыҙҙың ҡеүәтен артабан арттырыу өсөн, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәштә үҙенең ныҡһыҙ-сикһеҙ ихтыярын демонстрациялай. Ә буржуазия илдәрендә хеҙмәтсәндәр капиталистик ҡоллоҡҡа ҡаршы, һуғыш тоҡандырыусы империалистарға ҡаршы, халыҡтарҙың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн, демократия һәм тыныслыҡ өсөн көрәштә үҙҙәренең ҙур көстәрен һәм ихтыярҙарын демонстрациялайҙар.

Бөйөк совет халҡы 1948 йылғы Беренсе Май байрамын һуғыштан һуңғы тыныс төҙөлөш фронтында ҙур еңеүҙәр менән ҡаршылай. Дәүер большевиктар партияһы етәкселегендә совет халҡы бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, һуғыштан һуңғы халыҡ хужалығын уңышлы рәүештә яңыға бастыра һәм артабан үҫтерә. Яңы биш йыллыҡтың икенсе йылының программаһы уңышлы үтәлде. Бер йыл эсендә промышленность продукцияһы етештереү 22 процентҡа артты. Промышленностә бер кварталда уртаса продукция етештереү кимәле һуғыштан алдағы 1940 йылды ҡыуып етте. Хеҙмәт етештереүсәнлеге бер йыл эсендә 13 процентҡа күтәрелде.

Халыҡ хужалығының үҫеше тағы ла йылдан-йыл арта бара. Быйылғы йылдың беренсе кварталында бөтә промышленностең продукция етештереүе үткән йылдың беренсе кварталына сағыштырғанда 32 процентҡа артты, күмер 36 процентҡа, нефть — 41 процентҡа, прокат — 43 процентҡа күберәк етештерелде.

Совет крәҫтиәндәре большевиктар партияһы етәкселегендә ауыл хужалығын күтәреүҙә фидакәр эшләйҙәр. Улар ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын тулыһынса тормошҡа ашырыу өсөн көрәштә күренекле уңыштарға өлгәштеләр. Ауыл хужалығы илебеҙгә һуғышҡа тиклем иң яҡшы йылдарҙа биргән күләмдә иген бирҙе. Ауыл хужалығының валовой продукция етештереүе бер йыл эсендә 32 процентҡа, бөртөклө иген етештереүе 58 процентҡа артты. Иген өсөн көрәштә колхоз крәҫтиәндәре араһынан һоҡланғыс алдынғылар — юғары урожай мастерҙары үҫеп сыҡтылар. Илебеҙҙә 1395 алдынғы колхозсылар, трактористар һәм ауыл хужалығының башҡа работниктәре Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алдылар, уңыр меңләгән алдынғылар ордендар һәм медалдәр менән наградландылар.

Халыҡ хужалығындағы беҙҙең уңыштарыбыҙ социалистик ҡоролоштоң капиталистик ҡоролошҡа ҡарағанда тулы өҫтөнлеген асыҡ иҫбат итеүсе булып тора. Капиталистик илдәрҙә һуғыштан һуң хужалыҡта дөйөм тәшөнкөлөк хөкөм һөрә. Америка Ҡушма Штаттарында 1947 йылдың аҙағында промышленность продукцияһы етештереү һуғыштан алдағы кимәлдән 25 процентҡа түбәнәйҙе. Англияла, Францияла һәм Көнбайыш Европаның башҡа илдәрендә лә хужалыҡтың торошо бик ауыр хәлдә, ул илдәр һаман әле һуғыштан һуңғы ҡыйынлыҡтың батҡаҡлығынан сыға алмайҙар, көндән-көн Америка империалистарына бүйһонған хәлгә ҡала баралар.

СССР-ҙа бөйөк төҙөлөштөң уңыштары һәм социалистик ҡоролоштоң өҫтөнлеге бөтә донъя хеҙмәтсәндәрен беҙҙең илдең өлгөһөндә бөйөк көрәшкә саҡыра. Бөтә донъяла социализм һәм демократия лагере көндән-көн үҫә һәм ныҡый, ә империализм һәм реакция лагере көсһеҙләнә бара. Бөтә донъяның демократик көстәре Советтар Союзы тирәһенә туплаһалар. Халыҡ демократияһы илдәрендә хеҙмәтсән синыфтарҙың берҙәмлеге арта, улар үҙҙәренең социаль-экономик тормоштарын тамырынан үҙгәртәләр һәм социализмға алып барыусы юлға баҫтылар. Бөтә илдәрҙә лә халыҡтарҙың милли бойондороҡһоҙлоғо һәм мыҡлы тыныслыҡ өсөн көрәштең алдынғы сафында барыусы коммунистар партияларының тәьҫире үҫә. Капитализмдең ғүмере бөтә бара, беҙ бөтә юлдар ҙа коммунизмға алып барған быуатта йәшәйбеҙ. Бөгөн беҙ Беренсе Май байрамында:

«Демократияның һәм социализмдең еңеүе өсөн көрәшеүсе халыҡтарға сәләм!» тибеҙ.

Бөгөн 1 Май байрамын Башҡортостан хеҙмәтсәндәре ҙур еңеүҙәр менән ҡаршылайҙар. Республикабыҙ эшсәндәре Советтар Союзының башҡа халыҡтары менән бергә, илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан күтәреү өсөн, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү, ауыл хужалығының тағы ла яңы уңыштары өсөн арымай-талмай эшләйҙәр һәм халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында ла ҙур уңыштарға өлгәшәләр.

Республикабыҙҙың эшсәндәре алдында быйыл тағы ла мөһимерәк бурыстар тора. Яңы биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йыл программаһын тулыһынса һәм арттырып үтәргә кәрәк. Ауыл хеҙмәтсәндәре бөгөнгө көндөң иң мөһим бурысын хәл итеү — яҙғы сәсеүҙе ҡыҙыу темп менән ҡыҫҡа срокта үтәү өсөн көрәшергә бурыслылар.

Бөгөн 1 Май айҡанлы большевиктар партияһы совет халҡын тағы ла ҙур көрәшкә саҡыра:

«Советтар Союзының хеҙмәтсәндәре! Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерегеҙ! Биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылының планын бөтә төр продукциялар буйынса срогынан алда үтәйек!».

Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә, иптәш Сталин юлбашсылығында илебеҙ коммунизмдең аҡты бөйөк киләсәгенә бара. Бөйөк Сталин беҙҙе ҙур көрәштәргә рухландыра һәм гүзәл еңеүҙәргә алып килә.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен бөйөк большевиктар партияһы, совет халҡының һынаштарҙа сынығҡан авангарды, беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы Ленин—Сталин партияһы!

Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә, коммунизмдең еңеүенә табан алға!

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Черкес автономиялы өлкә Советенә һәм ВКП(б)-ның Черкес Өлкә Комитетенә

ССР Союзы Министрҙәр Советe һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты Черкес автономиялы өлкәһенең төҙөлөүенә 20 йыл тулыу көнөндә Совет Черкесияһының эшсәләрен, колхозсыларын һәм интеллигенцияһын ҡотлайҙар.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы Черкесия хеҙмәтсәндәренең политик яҡтан хоҡуҡһыҙ булыуына, милли иҙелеүенә һәм эксплоатацияланыуына сик ҡуйҙы һәм өлкәнең экономик үҫеше һәм черкес халҡының милли культураһының сәскә атыуы өсөн киң мөмкинлектәр асты.

Совет власы йылдарында Черкесия хеҙмәтсәндәре большевиктар партияһы етәкселегендә, бөйөк рус халҡының туғандаш ярҙамында хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Өлкәлә фабрика-завод промышленносе тыуҙырылды, металл эшкәртеүсе, аҙыҡ һәм еңел промышленность предприятиеләре һәм промышленностең башҡа тармаҡтарының предприятиеләре төҙөлдө. Колхоз ҡоролошо нигеҙендә өлкәнең социалистик ауыл хужалығы уңышлы үҫә. Октябрь революцияһына тиклем Черкесия халҡы тотошо менән тип әйтерлек грамотаһыҙ ине. Черкес халҡының үҙенең яҙмаһы, әҙәбиәте һәм мәктәптәре булманы. Совет власы йылдарында черкес һәм абазин телдәрендә яҙыу булдырылды, милли әҙәбиәт үҫә, милли интеллигенция кадрҙары үҫеп сыҡтылар. Өлкәлә 110 башланғыс һәм урта мәктәп, 3 техникум, учительский институт эшләй, 12 больница, 60-тан артыҡ амбулатория, врач һәм фельдшер пункттары асылды. Черкеск ҡалаһында драма театры төҙөлдө.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Черкес автономиялы өлкәһенең хеҙмәтсәндәре, беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлап, немец-фашист илбаҫарҙарына ҡаршы актив көрәштеләр. Совет Черкесияһының йөҙәрләгән тоғро улдары боевой ордендар һәм медалдәр менән наградланды.

Хәҙерге ваҡытта Черкес автономиялы өлкәһенең хеҙмәтсәндәре өлкәнең хужалығын һәм культураһын яңҡа баҫтырыу һәм үҫтереү эшенә үҙҙәренең бөтә көстәрен бирәләр.

ССР Союзы Министрҙәр Советe һәм ВКП(б) Үҙәк Комитеты Черкес автономиялы өлкәһенең 20 йыллығы менән Черкесия хеҙмәтсәндәрен ҡотлап, өлкәнең эшселәре, колхозсылары һәм интеллигенцияһы үҙ өлкәһенең халыҡ хужалығының һәм культураһының артабан сәскә атыуы өсөн, беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу өсөн киләсәктә лә арымай-талмай көрәшерҙәр, тип ышаныс белдерәләр.

СОВЕТ СОЦИАЛИСТИК РЕСПУБЛИКАЛАР СОЮЗЫНЫҢ МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕ.

БӨТӘ СОЮЗ КОММУНИСТӘР (большевиктар) ПАРТИЯҺЫНЫҢ ҮҘӘК КОМИТЕТЕ.

Советтәр Союзы Генералиссимусы Иосиф Виссарионович СТАЛИН.

ССР Союзы Ҡоралы Көстәре Министрының ПРИКАЗЫ

1 май 1948 йыл. № 18 *Мәскәү ҡалаһы.*

Иптәштәр, һалдаттар һәм матростар, сержанттар һәм старшиналар! Иптәштәр, офицерҙәр, генералдар һәм адмиралдар!

Бөгөн, бөтә совет халҡы менән берлектә, Советтәр Союзының Ҡоралы Көстәре бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнө — Беренсе Майҙы байрам итәләр.

Совет халҡы быйыл Беренсе Майҙы социалистик төҙөлөштөң бөтә участкаларында яңы еңеүҙәр обстановкаһында, ҙур патриотик күтәрелеш обстановкаһында ҡаршылай.

Совет кешеләренең үҙ-үҙҙәрен аямай эшләүҙәре һәм беҙҙең бөйөк Ленин — Сталин партияһының һәм беҙҙең Хөкүмәтебеҙҙең дөрөҫ политикаһы арҡаһында һуғыштың ауыр эҙемтәләрен бөтөрөү, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәү өсөн көрәштә бик ҙур уңыштарға өлгәшелде һәм совет халҡының материаль ёҡшы көн-күрешең байтаҡ күтәреү тәьмин ителде.

Һуғыштан һуңғы осорҙа Советтәр Союзы халыҡ хужалығы уңыштары бөтә донъяға беҙҙең совет общественный ҡоролошобоҙҙоң, беҙҙең совет социалистик экономикабыҙҙың ҡеүәтле көсөн һәм бахасһеҙ өҫтөнлеген яңынан күрһәтә.

Коммунизм төҙөү программаһын үтәй барып, үҙенең тыныслыҡ политикаһына тоғро булған совет халҡы һәм уның Хөкүмәте халыҡ-ара реакцияның беҙҙең илебеҙгә һәм яңы демократия илдәренә ҡаршы, бөтә донъяла тыныслыҡ эшенә ҡаршы юналтелгән әҙләнеүҙәрен онотмай.

Был шарттарҙа совет халҡының именлеген тәьмин итеүгә саҡырылған Совет Армияһы һәм Совет Хәрби-Диңгеҙ Флоты даими боевой әҙерлек хәлендә булырға һәм Тыуған ил алдында үҙенең хәрби бурысын намыҫ менән үтәргә тейештәр.

Беҙҙең Ҡоралы Көстәребеҙҙең бөтә личный составы үҙенең хәрби һәм политик белемен ныҡышмалы рәүештә камиллаштерергә, яңы хәрби техникаға эйә булырға, һизгерлекте күтәрергә һәм хәрби дисциплинаны ныҡ һакларға бурыслы.

Армия һәм Флоттың личный составында өлкән йәштәгеләрҙе демобилизациялау сәбәпле барлыҡҡа килгән үҙгәрештәр айҡанлы генералдар, адмиралдар һәм офицерҙәр хеҙмәттә ҡалған йәш һалдаттарҙы һәм матростарҙы, сержанттарҙы һәм старшиналарҙы хәрби уҡытыуға һәм тәрбиәләүгә айырыуса иғтибар бирергә, уларҙы Совет Ҡоралы Көстәренең боевой традицияларында, хәрби хеҙмәткә мөхәббәт һәм Советтар Союзын һаҡлаусы булыуҙың бөйөк исеме менән ғорурланыу тойғоһонда тәрбиәләргә тейештәр.

Алда торған йәйге өйрәнеү осоронда — ғәскәрҙәрҙе боевой әҙерләүҙең мөһим этабында — бөтә ғәскәри подразделениелар, частәр, карабалдар, соединениелар һәм хәрби уҡыу йорттары үҙ алдарына ҡуйылған бурыстарҙы уңышлы үтәргә тейештәр.

Иптәштәр, һалдаттар һәм матростар, сержанттар һәм старшиналар! Иптәштәр, офицерҙәр, генералдар һәм адмиралдар!

Ҡоралы Көстәр сафтарынан демобилизацияланған воиндар!

Һеҙҙе Беренсе Май көнө менән ҡотлайым һәм тәбрик итәм!

Хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамын билдәләп — ПРИКАЗ БИРӘМ:

Бөгөн, 1 Майҙа, Тыуған илебеҙҙең башҡалаһы Мәскәүҙә, Союзный республикаларҙың башҡалаларында, шулай уҡ Калининградта, Львовта, Хабаровскиҙа, Владивостокта, Порт-Артурҙа һәм герой ҡалаларҙа: Ленинградта, Сталинградта, Севастополдә һәм Одессала — 20 артиллерия залпы менән салют бирергә.

Йәшәһен героик совет халҡы һәм беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен совет Ҡоралы Көстәре!

Йәшәһен беҙҙең Хөкүмәтебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең Коммунистик Партиябыҙ!

Йәшәһен беҙҙең юлбашсыбыҙ — бөйөк СТАЛИН!

ССР Союзы Ҡоралы көстәре Министры
Советтәр Союзы маршалы Н. БУЛГАНИН.

СССР СОВХОЗДАР МИНИСТЕРСТВОҺЫНЫҢ БАШҠОРТ АССР-ЫНДАҒЫ ЙЫЛАЙЫР БӨРТӨКЛӨ АШЛЫҠ СОВХОЗЫНЫҢ ЗВЕНОВОДЫ В. С. СОЛОНИНГӘ СОЦИАЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙЫ ИСЕМЕ БИРЕҮ ТУРАҺЫНДА СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ УКАЗЫ

СССР Верховный Советe Президиумының 1947 йыл 29 март Указына ярашлы рәүештә, 1947 йылда совхоз бейҙәйҙән юғары урожай алған өсөн, государствоға ауыл хужалығы продукттарын тапшырыу планын үтәгән һәм 1948 йылғы яҙғы сәсеү өсөн бөртөклө ашлыҡ культуралары орлоҡтары менән тәьмин ителгән хәлендә, 26 гектар майҙандың һәр гектарынан 33,8-әр центнер бейҙәй урожайы алыусы Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының звеноводы Василий Степанович Солонинга Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирергә, Ленин ордене һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медале тапшырырға.

СССР Верховный Советe Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советe Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль. 29 апрель, 1948 йыл.

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш В. С. Солонин.

Өфө ҡала хеҙмәтсәндәренең халыҡ-ара 1 Май байрамы көнөнә арналған тантаналы йыйылышы

Кисә Башҡорт государство опера һәм балет театры залында Өфө ҡалаһы партия, совет һәм общественный ойошмалар вәкилдәренең халыҡ-ара байрам көнө 1 Майға арналған тантаналы йыйылышы булды.

Йыйылышты хеҙмәтсәндәрҙең Өфө ҡала Советe председателе иптәш Кравцов асты. Йыйылыштың президиумы составында ВКП(б)-ның Өлкә Комитеты секретаре иптәш Ваһапов, Башҡорт АССР-ы Верховный Советe председателе иптәш Нигматжанов, ВКП(б) Өлкә Комитеты секретарҙары иптәш Камнев, Докучаев, Шафиков, БАССР Министрҙар Советe председателе урынбаҫарҙары Грязнов, Әхмәров, Ғәлиев, Колесов иптәштәр, депутат Назаров, Советтәр Союзы Геройы Белов, СССР Верховный Советe депутаты Ҡотлобаева; яҙыусы Сәйфи Ҡудашев, атҡаҙанған артистка Бану Вәлиева иптәштәр һәм башҡалар.

Йыйылыш көслө алҡыштар аҫтында почетлы президиумға башында бөйөк И. В. Сталин торған политбюро членддарын һайлай.

Унан һуң доклад өсөн һүҙ Башҡорт АССР-ы Верховный Советe Президиумы председателе иптәш Нигматжановҡа бирелә.

Докладтан һуң көслө алҡыштар аҫтында бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең юлбашсыһы бөйөк Сталинга ҡотлау телеграммаһы ҡабул ителә.

Йыйылыштан һуң Башҡортостандың күренекле искусство көстәре ҡатнашлығында ҙур концерт булды.

Колхоз баҫыуҙарында ҙур хеҙмәт күтәрелеше

БАЙМАҠ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Райондың колхозсылары Беренсе Май байрамын колхоз баҫыуҙарында ҡаршылайҙар.

Сибай МТС-ы эшләһендәге колхоздарҙа ужым сәсеүлектәрен тырматыу һәм өлгөргән участкаларҙы һөйләп һөрөү эштәре бара. «Төйәләс» колхозы (председателе иптәш Нигматуллин) районда беренсе булып ер һөрөүгә һәм тырматыуға башланы. Һабансылар һәм тырмасылар араһында тәүге көндә үк эш нормаларын үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдерелде. Һабансыларҙан Сувркулов, Хажин һәм Юлдашбаев иптәштәр норма буйынса һәр көндә 0,60 гектар урынына, бәрәр гектар һәм унан да күберәк ер һөрәләр. Улар эштең сифатына айырыуса ныҡ иғтибар бирәләр. Был колхоз бөгөнгә 64 гектар ер һөрҙө һәм 17 гектар тырматты.

«Ирәндек» колхозы баҫыуҙарында ла ҡыҙыу эш башланды.

Бөйөк байрамды ҡаршылап

Республикабыҙың бөтә промышленность ҡалаларынан беренсе булып Черниковск ҡалаһы хеҙмәтсәндәре бөйөк байрамды яңы производство уңыштары менән ҡаршылайҙар. Ҡаланың химия заводы коллективы инициативаһы менән башланған май алды социалистик ярышы киң йәйелдереп ебәрелгән. Заводтарҙың, фабрикаларҙың цехтарында, группаларында, сменаларында, бригадаларында, шулай уҡ [illegible] стахановсылар, эшселәр, комсомолец-йәштәр бригадалары [illegible] алып барҙылар.

Предприятиеларҙың коллективтары байрамды үҙ өҫтәренә алған социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәп билдәләйҙәр һәм фидакәр хеҙмәт иттеләр. Ярыш инициаторы — химия заводы коллективы дүрт айлыҡ производство программаһын 20 апрелдә тамамланы, [illegible] 10 процентҡа күтәрергә һәм продукцияның [illegible] 10 процентҡа [illegible] алды, артығы менән үтәүгә өлгәште.

1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы коллективы ла [illegible] байрам [illegible] ... Ул биш айлыҡ производство планын [illegible] ... ла [illegible] планлан тыш 650 мең йәшник шырпы бирелде. Стахановсылар Николаев, Лукеева, Сергеева, Гәрәева, Муртазин, Кожевникова [illegible] бер ярым — икешәр норма эшләнеләр. Хәҙер коллектив июнь айы иҫәбенә эшләй.

Ни өсөн предприятиеларҙың машиналар төҙөү, нефть эшкәртеү заводтарының, фанера комбинатының һәм башҡа предприятиеларҙың коллективтары ла май алды ярышында биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүҙе тәьмин итеү лозунгыны аҫтында йәйелдерҙеләр. Машиналар төҙөү заводының начальниктәре Широков, Красногорский, Ющенков иптәштәр булған цехтарҙың коллективтәре йөкләмәләрен уңышлы башҡарып, ғүзәл күрһәткестәргә өлгәштеләр. Иптәш Елагин булған цехтың комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре ҙур инициатива күрһәттеләр. Улар эш сәғәтенән тыш эшләп март һәм апрель айҙарында пландан тыш 100 комбайн моторы сығарҙылар. Начальниктәре Широков, Красногорский булған цехтарҙың Обухов, Волков, Исаков, Успенский, Груздев иптәштәрҙең группалары, Портянкин, Тихомиров бригадалары заданиеларҙе үтәп, заводта алдынғылар сафында килалар.

Комсомолец-йәштәр бригадаларының ярышта айырыуса күренекле урын алып килгәнлектәре [illegible] тергә кәрәк. Улар араһында Ямалетдинов, Ухов иптәштәр етәкселек иткән заточниктәр, слесарь-лекальщиктәр бригадалары 1 майға тиклем үҙҙәренең биш йыллыҡ нормаларын тамамланылар. Махов, Крылов, Минеевалар етәкселегендәге комсомолец-йәштәр бригадаларының производство күрһәткестәре ҙа яҡшы.

Көн һайын бер ярым — икешәр норма биреүсе алдынғы эшселәр [illegible] предприятиеларҙа [illegible] күрһәттеләр [illegible].

Нефть эшкәртеү заводы коллективы ла май алды йөкләмәһен уңышлы ғына башҡара. Коллективтың заводтың технико-экономик күрһәткестәрен байтаҡ яҡшыртты. Беренсе квартал планын 102,4 процентҡа үтәне, апрель планын да артығы менән тамамланы. Коллективтың фидакәр хеҙмәте производствола миллиондарса һум сумма экономия бирелде.

Был уңыштарға партия, профсоюз ойошмаларының, производство командирҙарының [illegible] массабыл-политик эш алып барыуҙары, эске мөмкинлектәрҙе файҙаланыуҙа күп көс ойоштороу-техник саралары тормошҡа ашырыуҙары һәм эшселәрҙе намыҫлы хеҙмәткә мобилизовать итеүҙәре ярҙамында ирешелде.

Өлгөшелгән уңыштар менән бер рәттән ҡалаларҙа [illegible] предприятиеларҙа [illegible] етешһеҙлектәр ҙә күп әле. Бигерәк тә иптәш Рудаков етәкселек иткән төҙөлеш тресы программаһы айҙан-айға өҙөп килә. Санки былда партия һәм профсоюз ойошмалары, хужалыҡ етәкселәре төҙөүселәр араһында политик тәрбиә эшләрен етерлек алып бармайҙар, ярыш йөкләмәләренең үтәлешен тикшереүҙе йомшаҡ ойошторалар. Электр лампочкалары етештереү заводында ла оңошлай уҡ хәл. Партия ойошмаһы хужалыҡ мәсьәләләре менән бик өҫтән генә шөғөлләнә.

Черниковск ҡалаһы предприятиеларенең коллективтәре, партия һәм профсоюз ойошмалары өлгәшелгән уңыштарҙы нығытыу, артта ҡалыусыларҙы алдынғылар сафына сығарыу, 1948 йылдыҡ производство программаһын һәр бер предприятие коллективе тарафынан үтәлеүен тәьмин итеү өсөн тағы ла ныҡышмалыраҡ эшләргә тейештәр.

Ғ. Вәлиев,
ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете секретаренең промышленность буйынса урынбаҫары.

Металлургтарҙың бүләктәре

БЕЛОРЕТ. (Телефон аша). Беренсе Май байрамы хөрмәтенә бөтә илебеҙҙә йәйелдерелгән социалистик ярышта металлургтар яҡшы күрһәткестәргә өлгәштеләр. Улар байрамды производство бүләге менән ҡаршылау өсөн үҙ-үҙҙәрен аямай эшләнеләр. Домна, мартен мейестәре, сутунка һәм катанка стандары ярышы ныҡышмалы эш бараһы һәм ул нәтижәле калмаһы. Комбинат коллективе [illegible] айлыҡ планын срогынан дүрт көн алда, суйын етештереү һәм прокат эшләү планын 28 апрелдә үтәне. Еңеүҙәр менән ҡанатланған металлургтар апрелдең ҡалған көндәрендә тағы ла күтәренкелек темп менән эшләп, байрамға бүләккә йөҙҙәрсә тонна суйын, ҡорос еретеләр, прокат эшләп сығарҙылар.

Оҫталыҡтары, батыр хеҙмәттәре менән илектән да танылған ҡорос ҡойоусылар Хлесткин, Комелев, Кононов һәм башҡа күп кенә иптәштәр был көндәрҙә тағы ла яҡшыраҡ эшләнеләр. Уларҙың апрель айындағы хеҙмәттәре планлап тыш өсөр йөҙ тонна ҡорос биреү менән билдәләнде. Прокат цехында мастер иптәш Семакин сменаһы апрелдең һәр көнөндә ике планлан тыш продукция эшләнде. Вальцовщиктар Кәримов, Евсеев, сверловщик Орешко иптәштәр һәр сменала бер ярым — ике норма бирҙеләр.

И. М. Миронов,
Партияның Белорет ҡала комитете секретаренең промышленность буйынса урынбаҫары.

Бер айҙа биш норма

СТӘРЛЕТАМАҠ. Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводының күп эшселәре байрам алды көндәрендә стахановсы эш өлгөләре күрһәттеләр. Иптәш Бабиков етәкселек иткән токарҙар бригадаһы апрель айы заданиеһен 235 процентҡа, иптәш Левина бригадаһы 200 процентҡа үтәне. Ә модельщик Лутышкин, сверловщица Маргульская бер айҙа ике ярым — өс норма, ә токарь Вахитов биш норма бирҙе.

Йылдың икенсе ярты̆һы иҫәбенә

БӨРӨ. Районың емеш-елек заводы коллективы ярты йыллыҡ планды 124 процентҡа үтәп, байрамды йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә байтаҡ күләмдә продукция сығарыу менән ҡаршылаһы. Ә апрель айы планы 187 процентҡа үтәлде.

Шулай уҡ райпищепромкомбинат, мельҡомбинат коллективтәре лә байрамды ярыш йөкләмәләрен үтәү менән билдәләнеләр.

Планлан тыш 7 яҙыу машинаһы

Өфө яҙыу машиналары заводы коллективе апрель айы планын срогынан алда үтәне һәм 27 апрелгә пландан тыш 7 яҙыу машинаһы эшләп сығарҙы.

Бынан башҡа завод МТС-тарға, колхоздарға ат дағалау өсөн 200 килограмм ҡаҙаҡ, 500 дана универсаль ҡыпсыуыр, тракторҙар өсөн сальниктәр әҙерләне.

А. Имангулов.

Беренсе Май хөрмәтенә

Май алды ярышы инициаторы — Өфө агрегат заводының алдынғылары.
Заводтың йәштәре ярышта айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирҙеләр.
Һүрәттә: (һулдан уңға) 1. Үҙенең биш айлыҡ нормаһын 574 процентҡа үтәгән револьверщица иптәш Х. Тимербаева эш өҫтөндә. 2. Комсомолец-йәштәр бригадаһы бригадиры С. Насыров, бригада члены В. Назаров иптәштәр эштең сифатын тикшерәләр. Был бригада Беренсе Майға биш айлыҡ программаһын байтаҡ арттырып үтәне.
Ф. Жданов фотомонтажы.

Нефть ҡалаларында

Был көндәрҙә, республиканың завод һәм фабрикаларындағы кеүек үк, нефть промыселдәрендә, разведка участкаларында ла ныҡышмалы эш ҡайнаны. Байрам хөрмәтенә арҡалған ярышта һалған хеҙмәт һөҙөмтәһеҙ ҡалманы. Ишембай һәм Октябрьск ҡалаларының алдынғы нефть промыселдәре байрамды яҡшы эш күрһәткестәре менән ҡаршылайҙар.

Ишембай ҡалаһы предприятиелары коллективтәре араһында байрам алды ярышын башлап ебәреүсе икенсе промысел (директоры иптәш Перегудов), нефть эшкәртеү заводы (директоры иптәш Варшавер) эшселәре дүрт айлыҡ планды срогынан ике—өс көн алда үтәнеләр.

Нефть эшкәртеү заводында тракторҙар өсөн кәрәсин эшләп сығарыу темпы биш йыллыҡ планды өс ярым йылда үтәүҙе тәьмин итеү күләмендә бара. Заводта нормаларҙы үтәмәүсе бер генә эшсе лә юҡ. Ә оператор иптәш Соловьев бригадаһы апрель айының тәүге ике ун көнөндә заданиене 128 процентҡа үтәп оператор иптәш Имморатовтың алдынғы бригадаһын уҙып китте.

Промыселдәр араһында, үткән кварталдағы кеүек үк, беренсе промысел (директоры иптәш Славинский) алда бара. Промысел коллективенең стахановсы эше нефть һәм газ сығарыуҙың дүрт айлыҡ планын срогынан дүрт көнгә алда үтәүҙе тәьмин итте. Ә газокомпрессор заводы (директоры иптәш Старков) коллективе егерменсе апрелдән башлап май айы планы иҫәбенә эшләне.

Бораулау конторәһының Карташевка разведка участкаһында мастер иптәш Федосеев бригадаһы 14 көн эсендә 255 урынына 460 метр борауланы. Бораулаусылар Ярославцев, Япрынцев, Давыдов иптәштәрҙең бораулау темпы станок-айға мең метр тирләгендә барҙы.

Октябрьск ҡалаһы промыселдәре араһында иптәш Вовченко етәкселек иткән йәш промыселдең эш күрһәткестәре айырыуса яҡшы булды. Насар һауа шарттарына ҡарамаҫтан, бында скважиналар тәүлек буйына эшләнеләр. Инженер коммунист иптәш Екатерина Шетованың эште оҫта ойоштороуы яңы коллекторҙы срогынан алда эксплоатацияға биреүҙе тәьмин итте. Мастер иптәш Князев байрам алды көндәрендә 10 операторҙы техминимум курсында уҡытып сығарҙы.

(Үҙ хәбәрселәребеҙҙән).

Стахановсы эш

Рәжәп машина-трактор станцияһының механизаторҙары Беренсе Май байрамын комбайндар ремонтлауҙа стахановсы эш өлгөләре менән билдәләйҙәр. Механизаторҙар байрамға бүләк итеп 2 комбайн, 18 комбайн моторын ремонтлап сығарҙылар.

Комбайнерҙарҙан Хәкимә Хәжиәхмәтова, Рәкиә Ҡорбанова иптәштәр беренсе булып үҙ комбайндарын ремонтлап бөтерҙеләр.

М. Еникеева.

Улар коллективтәрҙең ғорурлығы

ӨФӨ. Башҡала предприятиеларенең күп коллективтәре, меңдәрсә эшселәре байрам хөрмәтенә арналған социалистик ярышта күренекле уңыштарға өлгәштеләр.

Паровоздар ремонтлау заводы был көндәрҙә үҙенең йөҙҙәрсә стахановсылары менән ғорурлана ала. Бында байрам алды ярышы көндәрендә 95 эшсе-стахановсы 1951—1952 йыл иҫәбенә эшләй. Ә 300 стахановсы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы нормаһын тамамлап, байрам көндәрендә 1949 йыл иҫәбенә эшләүҙе дауам иттерҙе. Заводта 18 йыл эшләгән слесарь Скоков өс эшсене слесарлеккә, 21 йыл эшләгән токарь Бушцева 20 эшсене токарлеккә өйрәтте.

Элек артта ҡалып килгән телефон аппараттары заводы коллективе тәүге кварталда өлгәшкән уңышын нығытып, апрелдә тағы ла күтәренке темп менән эшләне. Бында 300 эшсе Беренсе Майға йыллыҡ нормаларын тамамланы.

Стахановсы хеҙмәт менән бергә икеди эш тә киң ҡолас алды. Тик өс ай эсендә генә 105 рационализация тәҡдиме индерелде. Чистов, Мартова, Акбулатова, Голубев, Полежаев, Фәхретдинова, Невзорова кеүек тиҫтәләгән стахановсылар завод коллективенең ғорурлығы улар. З. Ишбулатов.

Баҫыу эштәре киңәйә

Ҡырмыҫҡалы районы колхоздарында массовый рәүештә ужымдарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу бара.

«1 Май», «Үрнәк» һәм Ғафури исемендәге колхоздар баҫыу эштәренә алдан яҡшылап әҙерләнеү, баҫыуҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ужымдарҙы аҙыҡландырыу планын үтәнеләр.

Каганович исемендәге колхоздың агротехниге иптәш Дильмөхәмәтов бөтә баҫыусылыҡ бригадаларын һәм звеноларын был эшкә мобилизовать итте. Звенолар үҙ участкаларын тиреҫ шыйыҡсаһы һәм ҡул менән аҙыҡландырҙылар. Бында ужымдар тигеҙ һәм ҡуйы булып сыҡҡандар.

«Победа», «Октябрь», «Маяк» колхоздарында ла баҫыу эштәре ҡыҙыу бара.

Социализм һәм демократия көстәре үҫәләр

Беренсе Майҙы — халыҡ-ара пролетариаттың боевой көстәрен смотр көнөн — бөтә донъяның хеҙмәт кешеләре социализм һәм демократия ҡырҡа нығыған шарттарҙа һәм социалистик система менән капиталистик система араһындағы көстәрҙең нисбәтләшелеге социализм файҙаһына ныҡ ҡыҫҡа рәүештә үҙгәргән шарттарҙа ҡаршылайҙар.

Империалистик лагерҙә ҡаршы демократик көстәргә етәкселек итеүсе Советтар Союзы экономиканың һәм культураның ҡеүәтле күтәрелеше юлынан коммунизмға табан бара. Ленин—Сталин партияһы тарафынан рухландырылыусы совет кешеләре үҙҙәренең көстәрен изге маҡсатҡа өлгәшеүгә: һуғыштан һуңғы сталинса биш йыллыҡты срогынан элек үтәүгә, социалистик государствоны тағы ла ҡеүәтлерәк һәм бай итеүгә бирәләр.

Биш йыллыҡтың тәүге ике йылында уҡ халыҡ хужалығын үстереүҙә күренекле уңыштарға өлгәшелде. 1.000 самаһы промышленность предприятиеһе яңынан баҫтырылды һәм эшкә ҡуйылды. 1947 йылдың һуңғы кварталында СССР-ҙың промышленносе продукцияһы етештереү буйынса һуғышҡа тиклем булған 1940 йылда уртаса бер кварталда сығарылған продукция кимәленә өлгәште. Ауыл хужалығында бөртөклө эшләүҙең культураһы, урожайы һуғышҡа тиклем кимәлгә етте. Аҡса реформаһы үткәрелде, карточка системаһы бөтерелде һәм тауарҙарҙың хаҡы байтаҡ түбәнәйтелде.

1948 йылдың беренсе кварталы яңы бик яҡшы уңыштар менән билдәләнде. Промышленностең валовой продукцияһын етештереү, 1947 йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда, 32 процентҡа, йәғни өстән бер өлөшкә тип әйтерлек үҫте. Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтары ышаныслы рәүештә алға баралар. Совет халҡының көн-күреш кимәле күтәрелә. Эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡы тайпылышһыҙ үҫә.

Ҙур рух күтәренкелеге менән солғанып алынған СССР хеҙмәтсәндәре биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерәләр.

Капиталистик илдәрҙең хәҙерге көндә емерек, тәртипһеҙ халдә булған экономикаһы менән сағыштырғанда совет социалистик государствоһының уңыштары айырыуса әһәмиәт ҡаҙаналар.

Бөтә капиталистик илдәрҙә инфляция арта һәм ҡыйбатсылыҡ үҫә бара, ул илдәрҙең ҡайһы берҙәрендә карточка системаһы тыуҙырыусы йыл һайын йәшәй.

АҠШ «Маршалл планы» ярҙамында Көнбайыш Европа илдәрен финанс-экономик һәм политик бәйһендорәжләлектәре менән тышаулай. Капиталистик илдәрҙә экономик кризис яҡынайыуын киләсәккә ышанмау, хәүефләнеү һәм ҡурҡыу хөкөм һөрә.

Беҙҙең халҡыбыҙ үҙенең киләсәгенә ныҡ ышана һәм иртәгәге көнө өсөн хәүефләнмәй. Совет экономикаһының бик яҡшы өлгәшеүҙәре социалистик системаның капиталистик системаға ҡарағанда бик ҙур өҫтөнлөктәре тураһында тағы бер таңҡыр дәрәслайҙар.

Совет культураһының буржуаз культураға ҡарағанда үлсәп бөткөһөҙ өҫтөнлөгө һуғыштан һуңғы осорҙа тағы ла асығыраҡ күренде. Серек барыусы буржуаз культура — был расаларҙы әҙәрләү, ваҙанлыҡ һәм хоҡуҡһыҙлыҡ, бандитизмде һәм сәнсешеүҙәрҙе, ике йөҙлөлөктө һәм кешене күрә алмаусылыҡты өндәүсе «культура» ул. Буржуаз культура ҡараңғылыҡҡа ни тиклем тәрәнерәк сумһа, социалистик ҡоролоштоң бөйөк өҫтөнлөктәре шул тиклем асығыраҡ күренәләр.

Советтар Союзы ныҡлы тыныслыҡ һәм демократия өсөн тайпылышһыҙ көрәшә. СССР — тыныслыҡ, халыҡтар иминселеге өсөн көрәшселәрҙе үҙ тирәһенә туплаған үҙәк ул. Бөтә илдәрҙең хеҙмәтсәндәре Советтар Союзының тышҡы политикаһын ҡайнар рәүештә яҡлайҙар, үҙҙәренең яҡшы тормошҡа булған өметтәрен уға бәйләйҙәр.

Иптәш Сталиндең:

«Көнсығыштан яҡтылыҡ килә! Көнбайыш үҙенең империалистик кешe ашаусылары менән ҡараңғылыҡ һәм ҡоллоҡ үсағына әйләнде» (Әҫәрҙәр, 4-се том, 182-се бит), тигән бик яҡшы һүҙҙәре беҙҙең көндәрҙә яңы көс менән яңғырайҙар.

* * *

Үҙәк һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европа илдәрендә халыҡ демократияһы эше уңышлы рәүештә нығый һәм үҫә. Үҙҙәренең айырым юлдары менән был илдәр үҫештең социалистик юлына күсеү өсөн ныҡлы нигеҙ һалалар. Империализм резервтәре булыуҙан улар социализм резервтәре булыуға әүерелделәр һәм капиталистик донъяны тағы ла ҡыҫыла төшергә һәм Европала уның территорияһын байтаҡ кәметергә мәжбүр иттеләр.

Империализм ҡоллоғонан ҡотҡарылған бөтә илдәрҙең халыҡтары, Советтар Союзының дуҫтарса яҡлауына таянып һәм бер-берһенә туғандарса ярҙам итеп, халыҡ хужалығын һәм культураны үстереүҙә ҙур уңыштарға өлгәшә баралар. Халыҡ демократияһының бөтә илдәре промышленностең продукция етештереүенең һуғышҡа тиклемге кимәленә килеп еттеләр, ә уларҙың ҡайһы берҙәре был кимәлде байтаҡ уҙып киттеләр.

Көньяҡ-Көнсығыш Европаның башҡа илдәре артынса Румыния ла халыҡ республикаһы юлына баҫты. Румынияның Бөйөк милли собраниеһенә һайлауҙар халыҡ демократияһы фронтының хәл иткес уңышы менән билдәләнде. Ул тауыштарҙың 90 процентынан артығыраҡын алды. Венгрияла һәм Чехословакияла хосуси промышленность предприятиеларен национализациялау киңәйә. Чехословакияла ер реформаһы үткәреү тамамланып килә.

Халыҡ демократияһы илдәре был уҡыштарға Англия-Америка империалистәренең һәм уларҙың агентуралары [illegible] эшселәренә ҡаршы ҡырҡыу көрәштә өлгәштеләр. Халыҡ демократияһы государстволары ышаныслы рәүештә үҙ юлдары менән баралар.

Халыҡ демократияһы государстволары йәҙендә Советтар Союзы ышаныслы дуҫтар һәм тоғро союзниктар тапты. Туғандаш славян халыҡтарының бөйөк дуҫлығы һәм ҡәрҙәшлек бәйләнештәре яңы мәғәнә һәм яңы йөкмәткә алды: был бәйләнештәр демократия һәм социализм өсөн берғәләшеп көрәштең ныҡлы фундаментына нигеҙләнәләр. СССР менән халыҡ демократияһы илдәренең ныҡлы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре дуҫлыҡ, үҙ-ара ярҙам һәм һуғыштан һуңғы хеҙмәттәшлек тураһындағы договорҙар менән нығытылдылар. Был договорҙарҙың тыныслыҡ һәм халыҡтар иминселеге өсөн әһәмиәте бик ҙур.

Совет-Венгрия договорына ҡул ҡуйған саҡта иптәш Молотов былай тине: «Был договорҙы төҙөшөү менән Советтар Союзының Ҡара диңгеҙҙән алып Балтик диңгеҙенә тиклем үҙенең тотош көнбайыш сиге буйындағы бөтә государстволар менән дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам тураһында пакты булясаҡ. Беҙ, совет кешеләре, бында бөтә күрше государстволар менән дуҫлыҡты нығытыуға һәм дөйөм тыныслыҡты нығытыуға юнәлтелгән сталинса тышҡы политиканы тормошҡа ашырыуҙа мөһим уңыш күрәбеҙ».

* * *

Көнсығыш илдәрендә йөҙ миллионлаған кешеләрҙең ҡеүәтле милли азатлыҡ хәрәкәте үҫә бара. Элек урындағы буржуазияға колонияларҙың иҙелгән халыҡтарының милли [illegible] көрәшенең башында тороу һәм уға хыянат итеү мөмкин була торғаны. Хәҙерге ваҡытта колониаль һәм бәйһендорәжле халыҡтарҙың киң йәйелдерелгән хәрәкәтенең башында хеҙмәтсән массаларҙың тоғро улдары, милли азатлыҡ өсөн ялҡынлы көрәшселәр — эшселәр һәм уларҙың авангарды коммунистар баралар.

Колониаль система кризисенең яңынан ҡыҫкенләшеүе империализмдең тылдарын ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Империалистар милли азатлыҡ көрәшен хәрби көс менән баҫтырырға тырышалар. Ләкин был тырышыуҙар колония халыҡтарының ҡоралды ҡаршылығына барып бәрелде һәм ҡаҙаҡҡа һуҙылған колониаль һуғыштарға килтерҙе.

Въетнам халыҡтары үҙҙәренең республикаһының бәйһендорәжһеҙлеген ғәрәйҙәрсә һаҡлайҙар. Индонезия халыҡ массаларының Голландия һәм Америка империализмена ҡаршы көрәше яңынан ҡыҫкенләште. Индия, Бирма, Египет, Трансиордания халыҡтарының милли азатлыҡ көрәше көсәйә бара. Палестина халыҡтары бәйһендорәжһеҙ милләт булып йәшәүгә ынтылалар. Империалистар колонияларҙа үҙҙәренең ҡаҡшаған хакимлектәрен һаҡлап тотоу өсөн төрлөсә манёвр яһарға һәм яңы юлдар эҙләргә мәжбүр булалар.

Ҡытайҙың күп миллионлы халыҡ массаларының ҡеүәтле хәрәкәте һаман киңерәк йәйелә бара. Халыҡ-азатлыҡ армияһы Ҡытай территорияһының өстән бер өлөшөн ҡуберәгән азат итте. Бында йәшәүсе халыҡ һаны 170 миллион кешегә етә.

Ҡытайҙың азат ителгән райондарында крәҫтиәндәргә ер биреү

(Дауамы 3-сө биттә).

Дәүләкән районы ауыл хужалығы алдынғыларынан бер төркөм.

Һүрәттә: (Беренсе рәт, һулдан уңға); Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Т. Е. Алехин, Ф. М. Павлов, Д. Л. Нестеров, А. В. Стоянов, Н. Е. Тарасенко иптәштәр. Ордендар менән наградланыусылар: (икенсе рәт) И. Ф. Винниченко, В. Д. Шуралева, М. Ә. Әсфәндияров, Р. С. Муллағалина, У. Ә. Ибраһимов; өсөнсө рәт — С. Г. Похомов, В. Н. Воронин, Г. Д. Дмитрачкова, М. А. Букин, В. В. Порачная иптәштәр.

Л. Якубов фотоһы.

Дан килтергән намыҫлы хеҙмәт

Тулҡынланып, гөрләп үтте Дәүләкән бойҙайы. Эре бөртөклө бойҙай тирә-яҡта ғына түгел, алыҫ урындарҙа ла маҡталды, ләкин ул әлек үҙен үҫтереүселәргә, был ерҙәргә дан килтермәне. Бойҙай тураһында һөйләгәндә бер кем дә Аюхан, Александровка ауылдары крәҫтиәндәрен күҙ алдарына килтермәнеләр, улар тураһында уйламаныҡлар. Тирҙәр ағыҙған хеҙмәт бер кем тарафынан да билдәләнмәне. Ул ауыр һәм йәберле булды. Бына бөгөн шул турала, хәтта күберәк тә әйтергә теләне булай «Коммунар» колхозының ябай колхозсыһы Галина Даниловна Дмитрачкова.

— Ниндәй ерҙә һәм ҡасан,— тине ул залға ҡарап,—ябай крәҫтиәндең хеҙмәте шулай хөрмәтләнгәнен ишеткәнегеҙ, күргәнегеҙ бар? Бер ҡайҙа ла, бер ҡасан да... Тик беҙҙең совет илендә генә юғары хөрмәтләнә ул.

Ул тулҡынланды, һүҙ әҙләне, ләкин танылған булып килгән хис тар уға һөйләргә ирек бирмәнеләр. Бөтә зал уны һүҙһеҙ ҙә аңланы, кемдер: «Рәхмәт!» тине, әле яңы ғына күкрәгенә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене тағылған Галина Даниловна сәхнәгә әйләнде һәм бөйөк Сталиндең портретына ҡараны.

— Юлбашсыға рәхмәт! — тине ул. Һуңғы һүҙҙәр көслө һәм оҙаҡ алҡыштар менән ҡаршыланды.

Игелек өсөн көрәш фронтында батыр хеҙмәт Дәүләкән ерҙәренә, колхоздарына, машина-трактор станцияларына, игенселәренә дан килтерҙе. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы саҡырыуы буйынса юғары урожай өсөн башланған һөжүм берҙәм фронт менән барҙы. Колхозсылар ҙа, тракторсылар ҙа, ауыл хужалығы специалистары ла, ҡарттар ҙа, йәштәр ҙа бер маҡсат — мөмкин тиклем күберәк иген үҫтереү, Тыуған илебеҙ алдындағы йөкләмәләрҙе срогынан алда һәм арттырып үтәү теләге менән эшләнеләр. Һөҙөмтәлә — яҡшы, урожай алыу планы ла, государствоға иген тапшырыу планы ла арттырып үтәлде.

Быларҙың бөтәһенә лә колхоз производствоһында намыҫлы эшләү һөҙөмтәһендә өлгәшелде. Бөгөн юғары исем һәм ҙур награда алыусы алдынғылар йәйҙең эҫе көндәрендә генә түгел, ҡышҡы һыуыҡ көндәрҙә лә тырышып эшләнеләр. Юғары урожай үҫтереү өсөн бөтә ижад көстәрен һалдылар. Тап шул хеҙмәт баҫыуҙарҙың батырҙарын тыуҙырҙы, алдынғыларҙың сафтарын ишәйтте.

Бына Социалистик Хеҙмәт Геройы Федор Максимович Павлов. Ул Дәүләкән МТС-ының директоры, оҫта ойоштороусы, ҙур коллектив хужалыҡтың талантлы етәксеһе. Бер нисә йылдар буйынса Башҡортостанда беренселекте алып килгән МТС, 1947 йылда ла алдынғылыҡ урынын бирмәне. Бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан уртаса 12,5-әр центнер урожай алынды. Шартлы һәр бер тракторға 879-ар гектар ер эшкәртелде. Был уңыштар — бөтә коллективтең хеҙмәте. Бына шуның өсөн дә өлкән агроном Дмитрий Леонтьевич Нестеров, өлкән механик Николай Евдокимович Тарасенко, трактор бригадаһы бригадиры Тихон Егорович Алехин иптәштәрҙең күкрәктәрен Ленин ордендәре, «Ураҡ һәм Сүкеш» алтын медалдәре биҙәй. МТС-та дүрт Социалистик Хеҙмәт Геройы!

Сәхнәгә 75 йәшлек слесарь Павел Федорович Гаврилов күтәрелә. Уның ҡорҙашы 72 йәшлек слесарь Павел Петрович Левин шатлығынан ниҙәргә лә белмәй, бергә ултырған күршеләргә ҡарап, үҙенең ҡайнар тойғолары менән уртаҡлаша.

Ҡарттарҙы йәштәр, ҡатын-ҡыҙҙарҙы ирҙәр алыштырып торалар. Улар күп — 215 кеше. Улар—колхоз производствоһының алдынғылары, новаторҙары, юғары урожай мастерҙәре. «1 Мая» колхозынан ғына хөкүмәт наградаларын алыусылар 22 кеше. Уларҙың араһында баҫыусылыҡ бригадаһының бригадиры Социалистик Хеҙмәт Геройы Александр Васильевич Стоянов.

Хәҙер инде сәстәре ағарған, егерме йыл буйынса өлкән землеустроитель булып эшләгән Идрис Илькин тураһында ла, 16—17 йәшлек Ваня Винниченко, Валя Шуралева тураһында ла дан йөрөй—улар игенселекте өс баҫыуҙан күп баҫыуға күсергән, ерҙе совет агрономияһы талаптары нигеҙендә эшкәртергә өйрәнгән социалистик баҫыуҙарҙың алдынғылары.

Дәүләкәнлеләр сталинса яңы биш йыллыҡтың икенсе йылын гүзәл уңыштар менән тамамланылар һәм хәл иткес өсенсө йылдың яҙғы сәсеүенә өлгәлә әҙерлек менән килделәр. Һәр бер звено, бригада, колхоз, МТС 1948 йылда тағы ла юғарыраҡ урожай алыуға ныҡлы ышана. Киләсәккә ышаныу — бөйөк көс. Ул, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Павлов, Алехин, орденлылар Әюпов, Фадеев, Казарин һәм башҡа бик күп кенә иптәштәрҙең һүҙҙәрендә һәм эштәрендә йәшәй, алға алып бара.

— «Ҡыҙыл Урал» колхозы члендәре быйыл тағы ла берҙәмерәк эшләйҙәр, бойҙайҙың да, арыштың да һәр гектарынан 30-ар центнер урожай алырҙар, — тип әйткән ҡыҙҙың — звено члене Муллағалина Рәжиәнең һүҙҙәре бер кемдә лә шик тыуҙырмай.

Ә. Насиров.

Дәүләкән.

Ике Социалистик Хеҙмәт Геройының ярышы

Социалистик Хеҙмәт Геройы Башҡорт АССР-ы Ҡырмыҫҡалы районы „Иҙел“ колхозы звеноводы иптәш Банат Батыроваға

Ҡәҙерле иптәш Батырова!

Һеҙгә Беренсе Май байрамы ҡотлау һүҙҙәре менән совет Ҡырғыҙстанының сөгөлдөр үҫтереүсе—иңсәһе, Калинин исемендәге колхоздың звеноводы Суракан Ҡайназарова мөрәжәғәт итә.

Һеҙҙең үҙегеҙҙе һәм һеҙҙең звено члендәрен бөтә хеҙмәтсәндәрҙең тантаналы байрамы булған Беренсе Май менән ҡотлайым, эшегеҙҙә һәр сталинса юғары урожай алыуҙа уңыштар теләйем.

Быйыл беҙ һеҙҙең менән Беренсе Май көндәрен айырыуса ҙур шатлыҡ менән үткәрәбеҙ. Һеҙгә, элекке хоҡуҡһыҙ башҡорт ҡыҙына, һәм миңә, элекке хоҡуҡһыҙ ҡырғыҙ ҡыҙы—батрачкаға, сөгөлдөр үҫтереү плантацияларындағы стахановсы эшебеҙ өсөн юғары исем—Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

Ҡырғыҙҙар һәм башҡорттар батша тарафынан иҙелгән һәм йәберләнгән халыҡ ине. Бары тик Совет власында, Сталинсә Конституция ҡанаты аҫтында ғына беҙҙең халыҡтар тиң хоҡуҡ, азатлыҡ һәм ирек алдылар. Был бәхетте беҙгә тыуған һәм һөйәкле иптәш Сталин бирҙе. Уның беҙҙең тураһындағы атайҙарса хәстәрлегенә беҙ намыҫлы хеҙмәт, колхоз баҫыуҙарының урожайлылығын күтәреү менән яуап бирергә тейешбеҙ.

Мин 12 йыл буйына звеномдағы 5—6 кеше менән һуғарыла торған ерҙә шәкәр сөгөлдөрө үҫтерәм. Һәр бер звено члененә 0,75 гектарҙан алып 0,80 гектарға тиклем сәсеүлек беркетелгән. Үҙемдең эшемде ныҡ яратам һәм уға бөтә йөрәгем менән бирелгәм.

Мин үҙем һәм Анекул Ибраһимова, Фатима Илипева, Ранечан Карабаева һәм Аҗак Тутуйбаева составындағы звеном быйыл шәкәр сөгөлдөрөнән тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн һеҙҙең менән һәм һеҙҙең звено менән ярышырға теләгебеҙҙе белдерәбеҙ.

Беҙ 5 гектар майҙандың һәр бер гектарынан уртаса 800-әр центнер урожай алырға һүҙ бирәбеҙ. Мин үҙ участкамда гектарынан кәмендә 1150 центнер урожай алырға вәғәҙә итәм.

Был эшемдән башҡа мин үҙемдең тәжрибәмде үҙ колхозыбыҙҙағы бөтә звеноларға күсерәсәкмен. Колхозыбыҙҙағы бөтә сәсеү майҙанында (110 гектар) һәр бер гектарҙан уртаса 370-шәр центнер урожай алырға өлгәшкәндә генә, үҙемдең бурысымды үтәлгән, тип иҫәпләйәсәкмен.

Иптәш Батырова, һеҙҙе һәм һеҙҙең звеноны беҙҙән алға алырға, атайыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ һөйәкле Иосиф Виссарионович Сталинде яңы биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылында шәкәр сөгөлдөрөнән тағы ла юғарыраҡ урожай алыу менән шатландырырға саҡырабыҙ.

Өлкә газеталар аша һеҙҙең яуабығыҙҙы көтәбеҙ.

Сәләм һәм хөрмәт менән:

Суракан Ҡайназарова,

Социалистик Хеҙмәт Геройы, депутат һәм Ҡырғыҙ ССР-ы Верховный Советы Председателе урынбаҫары, Калинин исемендәге колхоздың звеноводы.

Социалистик Хеҙмәт Геройы Ҡырғыҙстан ССР Верховный Советы председателенең урынбаҫары Суракан Ҡайназароваға

Суракан Ҡайназароваға ҡайнар сәләм!

Һеҙҙән, йыраҡ Ҡырғыҙстандан хат алдым. Беренсе Май байрамы менән тәбрикләүегеҙ һәм иптәштәргә хатығыҙ өсөн ысын йөрәктән һеҙгә рәхмәт. Был байрам көндәре минең өсөн икеләтә ҡатлыҡлы. Ошо көндәрҙә генә миңә иң юғары хөкүмәт наградаһы — Ленин ордене һәм Социалистик Хеҙмәт Геройының «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медален тапшырҙылар. Минең иптәштәрем. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендары алдылар. Был—минең тормошомда әһәмиәтлерәк көн. Башҡорт байҙарында батрачка булып эшләгәндә миңә ошондай ҙур һәм ҡиммәтле исемде бирерҙәр, тип уйлаһаммы ни мин?

Һеҙҙең менән беҙҙең яҙмыш—Ҡырғыҙстан һәм Башҡортостан ҡатын-ҡыҙҙарының яҙмышы бик оҡшашлы. Беҙ илебеҙ ҙә иҙелеүҙән һәм эксплоатациянан Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһы тарафынан ҡотҡарылдыҡ. Быны Ленин—Сталин партияһы эшләне. Беҙ үҙ Тыуған илебеҙҙең тигеҙ хоҡуҡлы граждандарына әйләндек.

Беҙ юғары исемде—Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алыуға партияның һәм хөкүмәттең колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар тураһындағы хәстәрлектәре арҡаһында ирештек. Намыҫлы хеҙмәт шатлыҡ һәм бәхет килтерҙе. Ә халыҡ һеҙҙең менән беҙҙе Верховный Совет депутаттары итеп һайланы. Беҙҙең бурыс үҙебеҙҙең колхоз баҫыуҙарындағы фиҙакәр хеҙмәт өлгөбеҙ менән социалистик игенселектең бөтә хеҙмәтсәндәрен биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүгә туплауҙан тора.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы бөтә совет халҡы алдына ауыл хужалығын иң ҡыҫҡа срокта аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү бурысын ҡуйҙы. Был бурысты үтәүҙә беҙҙең, шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүселәрҙең, рөлдәре ҙур. Тыуған илгә күп иген, кәрәк булған кеүек, шәкәр ҙа күп кәрәк.

Бына шуның өсөн дә һеҙҙең шәкәр сөгөлдөрөнән юғары урожай алыу өсөн социалистик ярышҡа саҡырыуығыҙҙы минең звено шатлыҡ менән ҡабул итә. Шәкәр сөгөлдөрөнән тағы ла юғарыраҡ урожай алып Тыуған илебеҙҙе шатландырайыҡ. Был беҙҙең юғары наградаға, большевиктар партияһының, совет хөкүмәтенең хәстәрлегенә яуабыбыҙ булыр.

Үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпкә алып, звено члендәре менән кәңәшләшкәндән һуң, беҙ өҫтөбөҙгә түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ.

Үткән йыл ике гектар майҙандың һәр бер гектарынан 611-әр центнер урожай алғайныҡ. Ә 1948 йылда беҙ 4 гектар майҙандың һәр гектарынан 650-шәр центнер шәкәр сөгөлдөрө үҫтерергә вәғәҙә бирәбеҙ. Мин үҙ делянкамдың гектарында 800-әр центнер урожай үҫтерергә йөкләмә алам. Бынан тыш беҙҙең звеноға бөртөклө ашлыҡ культуралары ла беркетелгән, уларҙан да урожай алыу планын арттырып үтәргә вәғәҙә итәбеҙ.

Үҙебеҙҙең тәжрибәләребеҙҙе күрше колхоз звенолары менән дә уртаҡлашасаҡбыҙ.

Һеҙҙең менән элемтә-әҙе бәйләнеш тоторбоҙ, хат яҙышырбыҙ, тәжрибәләр менән уртаҡлашырбыҙ.

Минең иптәштәремдән: Ғәзизә Байгилдинанан, Хәнифә Хәсәновананан, Фатима Хәсәновананан, Өсхәнйәл Хәсәновананан һеҙгә сәләм!

Һеҙгә эшегеҙҙә һәм общественный тормошоғоҙҙа уңыш теләйем.

Банат Батырова,

Социалистик Хеҙмәт Геройы, БАССР Верховный Советы депутаты, Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозының звеноводы.

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

ҙе, эшселәр синыфының тормошон яҡшыртыуҙы, производствоны һәм культураны үҫтереүҙе тәьмин итеүсе бик мөһим демократик үҙгәрештәр, ҡантанан ҡороуҙар үткәрелә.

* * *

Массаларҙың социалистик ынтылыштарының үҫеүе, социализм һәм демократия көстәренең өҙлөкһөҙ үҫеүе капиталистик системаның нигеҙҙәренең артабан ҡаҡшауын аңлаталар.

Капитализмдең позициялары бигерәк тә Европала йомшарҙы. Көнбайыш Европа халыҡтары үҙҙәренең милли азатлыҡтары һәм демократия өсөн, Американың Европа государстволарын ҡол итеү пландарына ҡаршы көрәш алып баралар.

Грецияла был көрәш героик грек халҡының азатлыҡ һуғышына — империализмдең монархист-фашистик ялсыларына ҡаршы азатлыҡ һуғышына ҡушылды. Бик ҙур ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, Грецияның демократик армияһы үҙ иленең байтаҡ өлөшөн азат итте.

Францияла халыҡ массаларын илдең милли бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәшкә туплаусы коммунистик партияның авторитеты тайпылышһыҙ үҫә бара. Франция буржуазияһы илдең интерестарын Америка империализмына асыҡтан-асыҡ һата. Францияның социалистик партияһының составына ингән күп кенә эшселәр коммунистар менән хеҙмәттәшлек итергә ынтылалар. Үҙҙәренең уң лидерҙәре тарафынан капиталға хеҙмәт итеүгә ҡуйылған социалистик партияның сафтары көндән-көн һаман күберәк һирәкләнә бара.

Италия реакцияһы 18 һәм 19 апрелдә Италия парламентына булып үткән бөтә донъя һайлауҙарҙа сит илдәрҙең тығылыуы ярҙамында һайлаусыларҙың төп массаларының ихтыярына ҡыҫым яһаны. Халыҡ-демократия фронтын емерер өсөн христиан-демократтар партияһы бөтә көсө менән тырышты. Ул уң элементтарҙың тауыштарын үҙенә йыйҙы, һайлау көрәшенә үҙенең бөтә резервтарын йәлеп итте, халыҡтың иң артта ҡалған ҡатламдарын мобилизовать итте. Ул мәжбүр итеүҙәр, алдауҙар, ҡурҡытыуҙар ҡулланды. Уға тауыштарҙың байтаҡ өлөшөн үҙенә йыйыу мөмкин булды. Ләкин, шулай булыуға ҡарамаҫтан, халыҡ-ара реакцияның төп уйы барып сыҡманы, уның Италия халҡының актив массаларын илдең политик тормошонан ҡыҫырыҡлап сығарырға маташыуы емерелде. Һайлауҙар, империалистарҙың бөтә тырышлыҡтарына ҡарамаҫтан, Италияла халыҡ демократияһы фронтының ныҡлығын күрһәтте. Халыҡ демократияһы фронты реакцияның берләшкән көстәре алдында сыҙап ҡына ҡалманы, бәлки яңы фекерҙәштәр тапты, тағы ла нығытылораҡ булып әүерелде, ул демократияның һәм Италияның милли бойондороҡһоҙлоғоноң ҡаҡшамаҫ көсө булып тора.

Германия халҡының демократик көстәре лә тыныслыҡҡа һәм демократияға, үҙ иленең берҙәмлегенә ынтылалар. 1948 йылдың мартында Берлинда булған икенсе немец халыҡ конгресы был ынтылыштарҙың асыҡ демонстрацияһы булды. Конгресс 1948 йылдың 23 майынан алып 13 июненә тиклем Германия государствоһының берҙәмлеге тураһындағы мәсьәлә буйынса халыҡ референдумы талап итеп бөтә илдә ҡултамғалар йыйыу үткәрергә ҡарар ҡабул итте. Конгресс тарафынан һайланған комиссия демократик немец республикаһының конституция проектын эшләүгә кереште.

Идара итеүсе круттары демократияға ҡаршы империалистик лагерға етәкселек иткән илдәрҙә лә демократия көстәре үҫәләр һәм нығыйҙар. АҠШ хеҙмәтсәндәре демократияға, бөйөк Советтар Союзы менән дуҫлыҡҡа ынтылалар. АҠШ-тың эшселәр синыфы империалистарҙың политикаһына забастовка хәрәкәтен киң рәүештә үҫтереү менән яуап бирә.

Англияның хеҙмәтсән массаларының лейбористар хөкүмәте политикаһынан ризаһыҙлығы һаман күберәк арта бара. Англия эшселәре бөтә донъяла тыныслыҡ, азатлыҡ һәм демократия терәге булыуы яғынан Советтар Союзының ролен юғары баһалайҙар. Улар СССР халыҡтарының героик көрәше кешелек донъяһын, шул иҫәптән Англия халҡын фашистик ҡоллоҡтан ҡотҡарып алып ҡалғанлығын аңлайҙар. Күп кенә профсоюз ойошмалары, предприятиеләрҙең эшселәр коллективтары, лейбористар партияһының түбәнге ойошмалары Англия һәм Америка монополистарының ихтыярын үтәүсе хөкүмәттең Англияның милли интерестарын һәләк итеүсе политикаһын ҡырҡа рәүештә ғәйепләйҙәр. Англияның ябай кешеләре СССР һәм халыҡ демократияһы илдәре менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрендә булыуҙы теләйҙәр. Лейбористик лидерҙарҙың ныҡлы ҡаршылыҡ күрһәтеүҙәренә ҡарамаҫтан, Англия эшселәр синыфы араһында коммунистарҙың авторитеты үҫә бара. Бының шулай булыуы, лейбористик хөкүмәт тарафынан «коммунистарға ҡаршы поход» иғлан ителеүгә ҡарамаҫтан, профсоюздарҙа коммунистарҙы етәксе урындарға һайлау фактыларының йышайыуында күренә.

* * *

Демократия һәм социализм көстәре бөтә урында ла үҫәләр. Улар халыҡ-ара масштабта тупланалар. Киң халыҡ-ара демократик ойошмалар: профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһы (ул 17 миллиондан артыҡ эшсене һәм хеҙмәткәрҙе берләштерә), ҡатын-ҡыҙҙар, йәштәр федерацияһы бында ҙур роль уйнайҙар.

Социализм һәм демократия көстәренең үҫеүе коммунистик хәрәкәттең үҫеүендә асыҡ күренә. Хәҙер коммунистик партияларҙың бөтә донъяла 20 миллиондан артыҡ члены бар. Был — хәҙерге замандың ҡеүәтле көсө.

Туғыҙ компартияның Информацион бюроһын төҙәү тәжрибәләр менән уртаҡлашыуҙы һәм был партияларҙың эшен координациялауҙы һәм шуның менән демократия өсөн, халыҡтарҙың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн, империализмға ҡаршы көрәштә уларҙың көстәрен туплауҙы тәьмин итте.

Туғыҙ компартия вәкилдәре кәңәшмәһенең марксизм-ленинизмдең еңеүле учениеһына нигеҙләнгән декларацияһы бөтә донъяның коммунистарын хәҙерге замандың халыҡ-ара хәленә фәнни анализ менән ҡоралландырҙы. Был тарихи документ империалистик лагерҙың агрессив пландарын фаш итте һәм реакцияға ҡаршы көрәш юлдарын билдәләне.

Империализмға ҡаршы демократик лагерь ныҡлы һәм оҙаҡҡа һуҙылған демократик тыныслыҡ өсөн арымай-талмай көрәш алып бара. Тыныслыҡ һаҡлауҙа тороусы көстәр бик ҙур, уларҙың резервтары һаҡап бөткөһеҙ. «Донъяның халыҡтары һуғыш теләмәйҙәр. Тыныслыҡ яҡлы көстәр шул тиклем күп һәм бөйөк, әгәр был көстәр тыныслыҡты яҡлау эшендә ныҡ торһалар, әгәр улар сыҙамлылыҡ һәм ныҡлыҡ күрһәтһәләр, ул саҡта агрессорҙарҙың пландары тулыһынса емереләсәк», — тине иптәш Жданов туғыҙ компартия вәкилдәренең Информацион кәңәшмәһендә.

Эшселәр синыфының синфи аңының һәм ойошҡанлығының тиҙ рәүештә үҫеүе сит илдәрҙә эшселәр хәрәкәтенең үҫеүендә хәҙерге моменттең үҙенсәлеге булып тора. Коммунистар партияһы тарафынан етәкселек ителгән эшселәр синыфы үҙ илдәренең дөйөм демократик хәрәкәтенең етәксеһе булып сығып яһай.

Уң социалистар эшселәр синыфының сафтарын тарҡаталар. Ошо тарҡаулыҡты бөтөрөү эшселәр синыфының бик мөһим бурысы булып тора. Уң социалистарҙың хыянатсыл политикаһын фаш итеү арҡаһында күп кенә илдәрҙә эшселәр партиялары берләшә башланылар. Был илдәрҙә коммунистар һәм социалистар эшселәрҙең берҙәм партияһын төҙәйҙәр, эшселәр синыфының берҙәмлеген тәьмин итәләр.

Румынияла һәм Венгрияла эшселәр партиялары берләштеләр ҙә инде. Чехословакияла был партияларҙың берләшеүҙәре тамамланып бара, Польшала эшселәр партияларын берләштереү өсөн көслө әҙерлек бара.

Италияла коммунистар менән социалистар ҡулға ҡул тотошоп көрәшәләр. Италия коммунистик һәм социалистик партияларының хеҙмәттәшлеге халыҡ демократияһы фронты эшенең нигеҙендә ята.

Уң социалистар тарафынан төҙөлгән һәм эшселәрҙең берҙәмлеге политикаһын өҙөр өсөн бөтә көсө менән тырышҡан халыҡ-ара социалистик конференция Комитеты тип аталған комитеттан Италияның, Чехословакияның, Польшаның социалистик партиялары һәм башҡа һул социалистик партиялар сыҡтылар. Был — халыҡ-ара оппортунизмға, блюмдарҙың һәм бевиндәрҙең, шумахерҙарҙың һәм сарагаттарҙың бөтә хаинлек политикаһына серьез удар булды. Социализм идеялары әлек беҙҙең көндәрҙәге кеүек шул тиклем киң, күп миллионлы халыҡ массаларының аңын солғап алғаны юҡ ине. Хеҙмәтсәндәр социализмда кешенең кеше тарафынан эксплоатацияланыуын бөтөрөүсе, халыҡтарҙың тулы тиң хоҡуҡлылығын, цивилизацияның ысын мәғәнәһендә үҫешен, демократияның сәскә атыуын тәьмин итеүсе общественный ҡоролошто күрәләр. Социализм империалистик талауҙы һәм иҙеүҙе бөтөрә. Буржуазияның һәм уның ялсылары — уң социалистарҙың тарихи үҫеш барышын туҡтатырға маташыуҙары юҡҡа ғына. Капитализмдең быуаты бөтөүгә яҡынлаша. Беҙ бөтә юлдар коммунизмға табан алып бара торған быуатта йәшәйбеҙ.

Бөйөк Сталин юлбашсылығында беҙҙең халҡыбыҙ коммунизмға табан бара. Халыҡтарҙың сикһеҙ хөрмәте һәм мөхәббәте менән уратып алынған иптәш Сталиндең исеме уларҙы Советтар Союзы еңеүле рәүештә барған коммунизм өсөн көрәшкә саҡыра.

Г. ДЕБОРИН.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Төньяҡ һәм Көньяҡ Корея вәкилдәренең берләшкән кәңәшмәһенең СССР һәм АҠШ хөкүмәттәренә мөрәжәғәте

ПХЕНЬЯН, 26 апрель (ТАСС). Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның политик партияларының һәм общественный ойошмаларының берләшкән кәңәшмәһе СССР һәм АҠШ хөкүмәттәренә мөрәжәғәт ҡабул итте. Был мөрәжәғәттә былай тип әйтелә.

Беҙ, Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның үҙенең сафтарында 10 миллиондан артыҡ члены берләштереүсе 56 политик партиялар һәм общественный ойошмалар вәкилдәре, берләшкән кәңәшмәгә йыйналып, һәм илдәге политик хәлде тикшереп, Совет Социалистик Республикалар Союзы һәм Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәттәренә түбәндәгеләр менән мөрәжәғәт итәбеҙ:

Союзниктарҙың тырышлыҡтары менән Кореяның япон империалистәренең арты быуат буйынса дауам иткән иҙеүенән азат ителеүенә тиҙҙән өс йыл тула. Япон колонизаторҙарының колониаль коллоғонан һәм баш-баштаҡлыҡтарынан азат ителгән Корея халҡы, оҙаҡ сыҙап көткән азатлыҡ килеп етте һәм Корея үҙ-үҙенә айырым йәшәй торған, бойондороҡһоҙ демократик государство булып әүерелә, тип иҫәпләп шатланды һәм тантана итте. Ләкин Корея халҡының үҙ илен суверенный демократик государство итеп күреүгә булған өметтәре һәм ышаныстары тормошҡа ашырылманы. Илебеҙ әлегә тиклем яһалма рәүештә ике өлөшкә бүленгән булып ҡалыуында дауам итә, был иһә Корея халҡының бөтә политик, экономик һәм культура тормошона бик насар тәьҫир итә. Кореяла хәҙер килеп тыуған политик хәлгә анализ яһап, беҙ берҙәм һығымтаға киләбеҙ — һәм был турала туранан-тура белдереүҙе үҙебеҙҙең бурысыбыҙ тип иҫәпләйбеҙ — Кореяла килеп тыуған түҙеп торғоһоҙ хәл өсөн АҠШ-тың хакимлек итеүсе түрәләре яуаплы булып торалар. Улар Кореяның көньяғында сепаратный һайлауҙар үткәрергә уйлайҙар һәм Кореяның ваҡытлыса бүленеүен мәңгелек итеү һәм илдең берләшеүенә һәм бойондороҡһоҙлоғон аяҡҡа баҫтырыуға ҡамасаулыҡ итеү маҡсатын тоталар.

Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның политик партиялары һәм общественный ойошмалары вәкилдәренең берләшкән кәңәшмәһе яуаплылыҡты тулыһынса аңлаған хәлдә, Корея халҡы Көньяҡта сепаратный һайлауҙар үткәрергә бер ваҡытта ла риза булмаҫ һәм уны тормошҡа ашырыуға бөтә көсө менән ҡамасаулыҡ итәсәк, тип белдерә. 27 миллионлы Корея халҡы исеменән беҙ көньяҡта сепаратный һайлауҙар үткәреүгә ҡаршы протест белдерәбеҙ. Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяның һәм сессия-ара комитетының Корея халҡы ҡатнашлығынан башҡа һәм уның теләгенә ҡаршы юкәлтеп ҡабул ителгән законһыҙ ҡарарҙарына ҡаршы протест белдерәбеҙ. Беҙ Берләшкән милләттәр ойошмаһының ваҡытлы комиссияһын һис кисекмәҫтән Кореянан сығарыуҙы талап итәбеҙ, сөнки был комиссия Кореяны тарҡатыу өсөн файҙаланыла, Корея халҡы, илдең төньяғында ла һәм көньяғында ла берҙәмлеккә һәм демократияға ынтыла. Корея халҡы үҙе, сит илдең тығылыуынан башҡа, берҙәм демократик хөкүмәт төҙөй ала. Беҙ, килеп тыуған шарттарҙа, Кореянан сит ил ғәскәрҙәрен бер үк ваҡытта сығарыу һәм Корея халҡының үҙенә үҙенең эске эштәрен хәл итеү хоҡуҡын биреү тураһында Советтар Союзының тәҡдимен тормошҡа ашырыуҙың иң ябай аҡыллы һәм дөрөҫ ҡарар булып тороуына тәрән ышанабыҙ.

Берләшкән кәңәшмә СССР һәм АҠШ хөкүмәттәренә үҙ ғәскәрҙәрен Кореянан бер үк ваҡытта сығарыуҙы һәм беҙҙең илебеҙ үҙенең милли бойондороҡһоҙлоғон ала алһын һәм бөтә донъяның азатлыҡ һөйөүсе халҡтары семьяһына тин хоҡуҡлы член булып инә алһын өсөн беҙҙең халҡыбыҙға ирекле рәүештә үҙ теләге буйынса, сит ил тығылыуынан башҡа Кореяның дөйөм милли демократик хөкүмәтенә дөйөм һайлауҙар үткәргә һәм берҙәм бойондороҡһоҙ демократик государство төҙөргә мөмкинлек биреүҙе һорап мөрәжәғәт итә.

30 май — Чехословакияның Милли собраниеһенә һайлауҙар көнө

ПРАГА, 28 апрель, (ТАСС). Эске эштәр министры Носек, 27 апрелдә Прага радиоһы аша сығыш яһап, 1948 йылдың 30 майында Милли собраниеға һайлауҙар үткәреү тураһында хөкүмәттең ҡарарын иғлан итте.

Носек, демократик парламентка буласаҡ һайлауҙар эске политик яҡтан ғына түгел, бәлки бик ҙур халыҡ-ара әһәмиәткә лә эйә буласаҡтар, тип айырыуса билдәләне.

Носектең белдереүенә ҡарағанда, 1948 йылдың 7 мартына алынған мәғлүмәттәр буйынса бөтә республикалағы һайлаусылар исемлектәрендә 8.001.427 һайлаусы бар. Был 1946 йылдың майында Закондар сығарыусы милли собраниеға һайлауҙар осоронда регистрацияланған һайлаусылар һанына ҡарағанда, 417.643 кешегә артығыраҡ.

Чехословакияла парламентка һайлауҙарҙың демократик һайлауҙар булыуын айырыуса билдәләп, Носек, бөтә политик партиялар ҙа күрһәтергә ризалыҡ биргән дөйөм кандидатлыҡ исеме менән бер рәттән, һәр бер кеше тарафынан тултырылған аҡ бюллетендәр биреү юлы менән ошо исемлеккә үҙенең риза түгеллеген белдерә ала, тип күрһәтте. Регистрацияланған һайлаусыларҙың кәмендә бер мең тауышын йыйнай алған һәр бер кеше теләһә ниндәй округта үҙенең кандидатлыҡ исемлеге менән сығыш яһай ала.

ИТАЛИЯ КОММУНИСТӘР ПАРТИЯҺЫНА ЯҢЫ ЧЛЕНДӘРҘЕҢ АҒЫЛЫУЫ

ПРАГА, 28 апрель, (ТАСС). Телепресс агентствоһының Римдан хәбәр итеүенә ҡарағанда, 7 мең эшсе һәм крәҫтиән һайлауҙар һөҙөмтәһе иғлан ителгәндән һуң Италия коммунистәр партияһына ингән. Партияға яңы члендәрҙең күпләп килеүе Римдә, Миланда, Палермола, Пиомбинола, Ливорнала һәм Туриндә билдәләнгән. Неапольдә һәм Килджала бер көн эсендә коммунистәр партияһына ҡабул итеүҙе һорап 600 ғариза бирелгән.

Англия-Америка оккупацион властәре Берлиндә 1 майға әҙерлеккә ҡамасаулыҡ итәләр

БЕРЛИН, 23 апрель. (ТАСС). «Теглихе Рундшау» газетаһы 27 апрель номерында [illegible] немец полицейскийҙары Берлиндең Америка секторы урамдарында [illegible] лозунгыларҙы йыртып [illegible] стеналарына [illegible]. Был полицейскийҙарҙың [illegible] белдереүенә ҡарағанда, [illegible] плакаттарҙы [illegible] алыу тураһында күрһәтмә алғандар ла икән.

АДН агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Крейцберг районында (Берлиндең Америка секторы) [illegible] стеналарына «Берҙәм Германия һәм [illegible] тыныслыҡ өсөн» тигән лозунг яҙыусы 17 кеше [illegible] немец полицияһы тарафынан ҡулға алынған. Америка хәрби администрацияһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, ҡулға алыныусылар «материаль зыян яһағандары өсөн» суд алдына баҫтырыласаҡтар.

АДН шулай уҡ, немец полицейскийҙары Крейцбергта СЕПГ-ның (Германияның социалистик берҙәм партияһы) район правлениеһе бинаһынан ошондай уҡ [illegible] плакаттарҙы алыуҙы талап иттеләр, әгәр [illegible] был бойороҡто үтәмәһә, Америка хәрби полицияһын саҡырыу менән ҡурҡыттылар, тип хәбәр итә.

Британия оккупацион зонаһынан алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, Англия хәрби властәре 1 майҙы байрам итеүгә әҙерлеккә һәр төрлө ҡамасаулыҡтар күрһәтәләр.

Үҙэшмәкәр түңәрәк концерт бирә

Концерт башланасаҡ тураһында үҙэшмәкәр түңәрәген етәксеһе Мәғафүр Хужин белдерә. Концертта ҡатын-ҡыҙҙарҙан һәм ирҙәрҙән 40 кеше ҡатнашасағын әйтеп, бөтә тамашасылар ҙа [illegible] «артистар» һәм [illegible] рәхмәт белдерҙе. [illegible] Бер юлы 40 кеше ҡатнашлығындағы концерттар бик йыш булып тормай бында, шуға күрә [illegible].

[illegible] Сталинға [illegible] йыр [illegible] аккомпанементы аҫтында башҡара. «Ҡурай — Бөрйәндә киң ҡулланыла торған [illegible] музыка ҡоралы. [illegible] Район сәхнәһендә уларҙың иң осталары — Сөләймән Йомагужин, Самат Сәғитов, Шәйхәмәт Хәкимов [illegible]. Йомагужин «Сәлимәкәй» [illegible]. Ҡаҙаҡҡа табан [illegible] скрипка Хужин ҙә, аккордеонист Ғәлләмов та, мандолинала уйнаусылар ҙа ҡушыла. [illegible] ансамбль!

Бейеү һәм йыр искусствоһының үҫешен [illegible] номерҙар Сабира Бикбулатова, Әхәт Сәғитов, Фәүзиә Төлкөбаева тарафынан башҡарылды. Бында бигерәк тә Сабира Бикбулатованың [illegible].

Рус һәм башҡорт композиторҙарының яңы йырҙарын халыҡҡа еткереүҙә үҙэшмәкәрлек түңәрәгенең [illegible] бар. [illegible]

Ошондай айырым [illegible] бөтә районда [illegible] искусствоһының [illegible].

Әле район культура йорто [illegible] искусствоһының осталары булып китерҙәр бәлки. Быны өсөн бөтә кәрәкле шарттарҙы тыуҙырырға, йәштәрҙең үҙэшмәкәрлек искусствоһын үҫтереүгә бәйле кәндә талап ителгәнсә хәстәрлек күрһәтергә генә кәрәк.

Ләкин шуны ла әйтергә кәрәк: район Советы етәкселәренең иғтибарһыҙлығынанмы, әллә Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу эштәре Управлениеһенең күҙ уңынан төшөрөлгән мәсьәләме был, — нисек кенә булһа ла, Бөрйәндә театр йәки музыка мәктәбе бөтөргән кешене, үҙэшмәкәрлек искусствоһын үҫтереүгә йүнәлеш бирерлек специалисте осрата алмайһың. Район үҙәгендәге һәм ауылдарҙағы драма һәм музыка түңәрәктәренең береһе лә квалификациялы етәкселәр, иң кәмендә — консультанттар менән генә булһа ла, тәьмин ителмәгән. Һуңғы өс-дүрт йыл эсендә Өфөнөң культура-ағартыу учреждениеларенән бер генә кешенең дә килмәүен әйтһәң, дөйөм иғтибарһыҙлыҡ картинаһы тағы ла асыҡлана төшә. Бер тотоштан тип әйтерлек башҡорт милләтенән генә торған районда үҙэшмәкәрлек искусствоһын үҫтереү менән етәкселек итеүгә ошондай ҡараш ты һис тә нормаль хәл тип иҫәпләп булмай. Был эштә яуаплы кешеләр махсус рәүештә кәңәшеп мәсьәләне хәл итеү тураһында етди саралар күрергә, халыҡ араһынан сыҡҡан таланттарға үҫеү өсөн мөмкинлектәр тыуҙырырға, тейештәр.

F. ӘХМӘТШИН.

(Махсус хәбәрсебеҙ).

Һүрәттә: Өфөләге 6-сы номерлы балалар баҡсаһында тәрбиәләнеүсе балаларҙан бер төркөм.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Бөтәһе лә һинең өсөн, йәш тыуған!

Тәрәҙә йөрәктарҙан сыҡҡан шат йырҙар күккә үрләләр. Май йырҙары улар! Был йырҙарҙы өлкәндәр ҙә, йәштәр ҙә, балалар ҙа йырлайҙар.

Бәхет, азатлыҡ өсөн
Күп ҡан түгелгән ерҙә
Ленин менән Сталин
Ватан бирҙеләр беҙгә!

— Әйе, — йәш тыуған, — тим мин үҙ ике йәшлек Риваттың елкәһенән һыйпап, — һин социализм осоронда тыуҙың. Һин ҡалала гигант заводтар, гүзәл культура һарайҙары, йәшел баҡсалар, матур стадиондар күрәһең. Һин колхоз баҫыуҙарында меңләгән тракторҙар, комбайндар күрәһең.

Һин аҙ ғына үҫкәйнең, һинең алдыңда ҙур, яңы, яҡты мәктәптәрҙең ишектәре асылды. Һинә уҡытыусы килде һәм:

— Мәктәпкә рәхим ит! — тине.

Элек улай түгел ине. Батша Россияһында һинең кеүек эшсе балаларына мәктәп-ишектәре ябыҡ ине. 1914—15 йыл Россияла 7,9 миллион бала уҡыһа, хәҙер был һан 30 миллионға етте. Был һан эсендә һин дә бар.

Һинең өсөн китапханаларҙың ишектәре асылды. Батша Россияһында балалар китапханалары юҡ ине. Хәҙер Советтар Союзында балалар өсөн 1.132 китапхана эшләй.

Һинең өсөн йәш техниктар станциялары ишектәре асылды. Батша Россияһында ундай станциялар юҡ ине, хәҙер уларҙың һаны 400-ҙән артты.

Һинең өсөн йәш натуралистәр станциялары ишектәре асылды. Бындай станциялар Советтәр мәлендә генә барлыҡҡа килде. Беҙҙә йәш натуралистәрҙең 200 станцияһы эшләй.

Һинең өсөн туристик станцияларҙың ишектәре асылды. Батша Россияһында улар юҡ ине. Хәҙер туристик станциялар беҙҙең илдең һәр бер ҡалаһында бар.

Һинең өсөн музыка мәктәптәренең ишектәре асылды. Беҙҙәге 400-ҙән артыҡ музыка мәктәбендә һинең кеүек 75 мең бала уҡый.

Һинең өсөн театрҙарҙың ишектәре асылды. Беҙҙә балалар өсөн 150-нән артыҡ театр эшләй. Беҙҙән башҡа бер илдә лә балалар өсөн махсус театрҙар юҡ.

Һинең өсөн пионер лагерҙәренең ишектәре асылды. Беҙҙең һәр бер ҡалала, районда, хатта айырым колхоздарҙа ла пионер лагерҙәре бар. Балалар здравницаһы — «Артек» бөтә донъяға билдәле.

Һинең өсөн 14 журнал, 19 газета сығарыла. Батша Россияһында балалар өсөн иң бары бер газета сығарылған. 1946 йылда һинең өсөн 26.064.000 китап баҫылды.

Һинең өсөн 464 спорт мәктәбе, 20 мең физкультура майҙаны эшләй.

Былар бөтәһе лә һинеке, йәш иптәш!

Һыны яҡта йәшәгән кешеләр, ҡышҡы һыуыҡтың нимә икәнлеген белмәгән кеүек, һинә икенсе донъяны, капиталистик донъяны белеүе лә ауыр. Капиталистик илдәрҙә кешеләрҙе төрлө ҡатламдарға, ярлыға, байға бүләләр. Унда бер төркөм байҙар миллионлаған ярлылар иҫәбенә йәшәйҙәр.

Капиталистәр һәм помещиктар тарафынан таланған, техниканан артта ҡалған батша Россияһында ла шулай ине.

Хәҙер һиндә булғанларҙың береһе лә батша Россияһында йәшәгән малайҙарҙа ла, ҡыҙҙарҙа ла юҡ ине. Улар капиталистик илдәрҙә йәшәгән эшсе һәм батрак балаларында әле лә юҡ.

Беҙҙең халыҡ героик хеҙмәттә яулап алған бөтә нәмәһен һинә бирә. Һинең бәхетле бала сағың ғына түгел, яҡты киләсәгең дә тәьмин ителгән.

Һинең турында беҙҙең Совет хөкүмәте, большевиктәр партияһы, беҙҙең бөйөк дәһиебеҙ Сталин ҡайғырта.

Һин был бөйөк бүләктәрҙең ҡәҙерен бел, йәш дуҫ!

Ринат салют менән яуап бирә:

— Ленин — Сталин эше өсөн көрәшкә һәр ваҡыт әҙермен!

Был һүҙҙәрҙә йәш быуындың үҙ-үҙенә ышаныслы тауышы яңғырай.

Оҙаҡ та үтмәҫ, һин йәш быуын, бөйөк төҙөлөш эштәренең актив көрәшсеһе булырһың, һинә яҡты һәм бөйөк исемле гүзәл йортто төҙөп бөтөрергә тура килер. Ә ул — коммунизм!

Ә. ИХСАН.

Шеф ярҙамы

Паровоздар ремонтлау заводы коллективы Сынташтамаҡ, Языково МТС-тарына һәм Шишмә районының Калинин исемендәге колхозына шефлыҡ итеп килә.

Завод коллективы күптән түгел Сынташтамаҡ МТС-ына күп һанда китаптар һәм журналдар ебәрҙе. Уларҙың дөйөм суммаһы 3 мең һумдан арта. Калинин исемендәге колхозда заводтың үҙэшмәкәрлек түңәрәге тарафынан 4 тапҡыр концерт бирелде.

Яңы бине йыллыҡтың өсөнсө яҙын һәм урожай йыйыу кампанияһын үткәреүҙә МТС-тарға актив ярҙам итеүҙе завод коллективы үҙенең мөһим бурысы итеп ҡуйҙы. Яҙғы сәсеү ваҡытында практик ярҙам күрһәтеү өсөн МТС-тарға токарҙар, слесарҙар ебәрҙе.

Партия ойошмаһы МТС эшселәре араһында, трактор бригадаларында халыҡ-ара хәл һәм башҡа политик темаларға доклад һәм беседалар үткәреү өсөн махсус докладсылар бүлде.

Агитбригада колхоздарға китте

Яҙғы сәсеү осоронда баҫыуҙа эшләүсе колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн Иглин район үҙәгендәге культура йорто эргәһендәге драма-хор үңәрәге коллективынан [illegible] етәкселегендә агитбригада төҙәлгән. [illegible] агитбригада ике аҙна буйына [illegible] эшләрлек азыҡ [illegible] махсус маршрут буйынса колхоздарға сығып китте.

Агитбригада колхоз клубтарында һәм [illegible] спектаклдәр ҡуйыуҙа һәм концерттар бирә. Уның программаһында совет композиторҙарының яңы көйҙәре, Сталин премияһы лауреаттарының әҫәрҙәренән өҙөктәр, бейеү номерҙары һәм шулай уҡ бер актлы пьесалар бар. Агитбригада коллективы баян, гармонь, скрипка, мандолина, гитара һәм башҡа төрлө музыка ҡоралдары менән тәьмин ителгән.

Өфө байрам көндәрендә

Республиканың башҡалаһы хеҙмәтсәндәре революцион байрам — 1 Майҙы ҙур хеҙмәт уңыштары менән ҡаршылайҙар. Предприятиеларҙың, учреждениеларҙың биналары, клубтар бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталиндың һәм уның соратниктарының портреттары, плакаттар, лозунгылар менән биҙәлгәндәр. Ҡала ҡыҙыл байраҡтарға төрөнөп, һоҡланғыс күренеш алған.

Шат күңелле, күтәренке рухлы Өфө хеҙмәтсәндәре бер-береһен байрам менән ҡотлайҙар.

Тик 29—30 апрелдә генә, почта аша өфөләләр үҙҙәренең яҡындарын, таныштарын байрам менән ҡотлап, 700-ҙән артыҡ телеграмма ебәрҙеләр.

* * *

Ҡаланың театрҙары, киноларҙы хеҙмәтсәндәрҙе байрам көндәрендә көндөҙ һәм кис өҙлөкһеҙ хеҙмәтләндерәләр. Рус драма театрында 1 һәм 2 майҙа «Цитаделдәге тормош» һәм «Ете ил сәхнәһында» пьесалары ҡуя. Башҡорт государство академия театры, филармония был көндәрҙә концерттар бирә.

«Октябрь» кино-театрында — «Өсенсе удар», «Салауатта» — «Сәрәйнанан ҡыуған малай», Матросов исемендәге кинола — «Гвардия рядовойы Александр Матросов» тигән картиналар күрһәтелә.

* * *

Кинофикация управлениеһының күсмә киноларҙы мәктәптәрҙә, балалар йорттарында сеанстар бирәләр. Улар «Ленин Октябрь көндәрендә», «Юлбарыҫ», «Ҡыҙыл сәләт курено ағасында», «Ауыл уҡытыусыһы» һәм башҡа картиналар күрһәтәсәктәр.

Шахмат матч-турниры

28 апрелдә, кисектерелгән партияларҙы уйнап бөтөрөү көнөндә Керес уйнап торһаһа, үҙен Решевскийҙан еңелгән тип таныны. Ботвинник — Смыслов партияһын уйнап бөтөү 4 сәғәтте һуҙылды. Ҡаршылыҡтар 80 йөрөш яһағас, улар бер яҡтың да отыуы менән уйынды бөтөрөргә килештеләр.

Шулай итеп, 15 турҙан һуң матч-турнирҙа ҡатнашыусыларҙың хәле түбәндәгесә: Ботвинниктың уң дүрттән — 10, Решевскийҙың уң дүрттән — 7,5, Керес менән Смысловтың уң биштән — 7,5, Эйвеның уң дүрттән — 3,5 очкоһы бар.

Уң туғыҙынсы тур 3-сө майҙа буласаҡ. Был көнде Решевский — Ботвинник, Смыслов — Эйве осрашасаҡтар. Керес уйындан буш.

(ТАСС).

ХРОНИКА

Бынан бер ни тиклем ваҡыт элек Австралия хөкүмәте дипломатик вәкәләттәрҙе посольстволарға үҙгәртеп төҙөү һәм СССР менән Австралия араһында посолдар алышыу тураһында тәҡдим менән СССР хөкүмәтенә мөрәжәғәт иткәйне.

Был айҡанлы СССР Верховный Советы Президиумы СССР-ҙың Австралиялағы Посланнигы иптәш Николай Михайлович Лифановты СССР-ҙың Австралиялағы ғәҙәттән тыш һәм тулы хоҡуҡлы посолы итеп билдәләне.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

Н00720. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 88 4 Май шишәмбе

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

хаҡы 20 тин

СССР Министрҙәр Советы халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһында ҡарар ҡабул итте.

Государствоға өс-дүрт аҙналыҡ эш хаҡыбыҙҙы бурысҡа бирәйек!

Бер генә хеҙмәтсән дә яңы заем облигацияһын алмайынса ҡалмаһын!

СССР Министрҙәр Советында

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһында

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең государство планын — һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылы планын үтәү һәм хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнөң бөтә биш йыллыҡ планын срогынан алда тормошҡа ашырыу өсөн халыҡтың средстволарын ылыҡтырыу маҡсатында ССР Союзы Министрҙәр Советы ҠАРАР ИТТЕ:

1. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын 20 миллиард һум суммаһында 20 йыл срок менән сығарырға.
2. Заем облигацияларын һәм унан килгән доходтарҙы, шул иҫәптән отоштарҙы государство һәм урындағы налогтар һәм түләүҙәрҙән ҡотҡарырға.
3. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһында СССР Финанс Министерствоһы тарафынан тапшырылған шарттарҙы раҫларға.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы заемы—бөтә халыҡ заемы

Кисә Совет Хөкүмәте СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһында ҡарар ҡабул итте. Был 20 миллиард һум күләмендә сығарылған яңы заемдың маҡсаты бик асыҡ һәм аңлайышлы. Заемдан йыйналған аҡса һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы халыҡ хужалығы планы менән ҡаралған бөйөк төҙөлөш эштәренә тотоласаҡ. Совет халҡы тарафынан индерелгән был заем аҡсаһы илебеҙ халыҡ хужалығын артабан күтәреүгә, хеҙмәтсәндәрҙең культура һәм көн-күреш шарттарын тағы ла яҡшыртыуға, СССР-ҙың ҡеүәтен көсәйтеүгә ярҙам итәсәк.

Беҙҙең илебеҙҙә, шул иҫәптән Башҡортостанда государство заемына яҙылыу — хеҙмәтсәндәрҙең Ленин—Сталин партияһы тирәһенә, Совет Хөкүмәте тирәһендә тағы ла тығыҙыраҡ тупланғанлыҡтарын күрһәткән совет патриотизмының гүзәл демонстрацияһы ул.

Илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре үткән йыл государство заемына хөкүмәт тарафынан сығарылған суммадан бик күп артыҡ яҙылып һәм үҙҙәренең фиҙакәр хеҙмәттәре менән халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү биш йыллығының икенсе йылы планын арттырып үтәүҙе тәьмин иттеләр. 1947 йылда промышленность предприятиеләре валовой продукция сығарыуҙың йыллыҡ планын 103,5 процентҡа үтәнеләр, ә был, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 22 процентҡа артығыраҡ тигән һүҙ. Шуның менән бергә сталинсе биш йыллыҡтың тәүге ике йылы эсендә государство әһәмиәтендәге 1.900 предприятие төҙөлдө, аяҡҡа баҫтырылды һәм хәрәкәткә индерелде. Колхоз крәҫтиәндәре үткән йылда государствоға һуғышҡа тиклемге иң яҡшы урожайлы йылдағы кимәлдә иген бирҙеләр.

Илебеҙҙең социалистик экономикаһын үҫтереүҙә һәм нығытыуҙа совет халҡының өлгәшкән уңыштары тулы ҡиммәтле совет аҡсаһын ҡабаттан аяҡҡа баҫтырырға һәм берҙәм государство хаҡтары буйынса киң йәйелдерелгән, асыҡ совет сауҙаһына күсергә ыңғай шарттар тыуҙырҙы. Шул нигеҙҙә Совет Хөкүмәте карточка системаһын бөтөрөү һәм аҡса реформаһы үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Партия һәм хөкүмәт тарафынан үткәрелгән был саралар халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү темпын тиҙләтергә, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреш шарттарын тағы ла яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе. Партия һәм хөкүмәттең хеҙмәтсәндәр массаһы тураһындағы был хәстәрлегенә совет халҡы илебеҙҙең халыҡ хужалығын үҫтереүҙең беренсе квартал планын арттырып үтәү менән яуап бирҙе.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү биш йыллығының тәүге ике йылы планын уңышлы үтәп сығыу 1948 йылда тағы ла ҙурыраҡ темптар менән эшләүгә нигеҙ һалды. 1948 йылда халыҡ хужалығын үҫтереү өсөн 149 миллиард һум аҡса тотоласаҡ, был үткән йылға ҡарағанда 16,3 миллиард һумға артығыраҡ, тигән һүҙ. Колхозсылар быйыл сәсеү майҙанын 15,6 процентҡа, ә [illegible] культура сәсеүен 35 процентҡа арттырыу күҙҙә тотола. Башҡортостан колхозсылары үткән йыл [illegible] сәсеү майҙанын 28 мең гектарға [illegible], был йыл [illegible] 441 мең гектарға арттырыу планлаштырыла. Шул иҫәптән бойҙай сәсеү майҙаны 350 мең гектарға артасаҡ. Быны тәьмин итеү өсөн государство республикабыҙға өҫтәмә рәүештә етерлек тиклем сәсеү орлоғо бирҙе. Иөҙәрләгән тракторҙар ебәрҙе.

Хеҙмәтсәндәрҙең үҫә барған талаптарын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында, союз күләмендә, быйыл тик кооператив һәм урындағы промышленность предприятиеләре буйынса ғына кийе-мамыҡ, йөн, етен һәм ебәк туҡымалары эшләп сығарыу, үткән йылға ҡарағанда, 37 процентҡа, ойоҡ, ойоҡбаш етештереү 45 процентҡа, трикотаж кейемдәр етештереү 22 һәм аяҡ кейемдәре етештереү 23 процентҡа арттырыла.

Государство бюджете 1948 йылда социаль-культура сараларына 116,5 миллиард һум, йәғни үткән йылға ҡарағанда 10 миллиард һумға күберәк расход тотоуҙы билдәләй. Бөтә дөйөм уҡыу мәктәптәрендәге уҡыусылар һаны 1948-1949 уҡыу йылында 3,8 миллион кешегә артасаҡ. Һаулыҡ һаҡлау, социаль-тәьминәт буйынса ла үткән йылға ҡарағанда расход бик күп арттырыла.

Быйыл яңы заемға яҙылыу — сталинсе дүртенсе биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылы планын срогынан алда үтәү өсөн барған бөтә халыҡ көрәшенең иң ҡыҙыу осорында, гәйәт ҙур производство күтәрелеше шарттарында үтә. Хөкүмәттең заем сығарыу тураһындағы ҡарары иғлан ителгәндек һуңындағы тәүге сәғәттәрҙә үк республикабыҙҙың предприятиеләрендә, учреждениеләрендә, колхоздарҙа заемға яҙылыу гәйәт ҙур политик күтәренкелек менән башланды.

Өфө ҡалаһының хеҙмәтсәндәре өс-дүрт сәғәт ваҡыт эсендә 30 миллион һумлыҡ заемға яҙылдылар. Ауыл райондарынан Саҡмағош үткән йылғы кеүек үк алда бара. Саҡмағош районының хеҙмәтсәндәре шул уҡ бер сәғәт эсендә 950 мең һумлыҡ заемға яҙылып, 350 мең һумды аҡсалата индерҙеләр. Яңауыл районында эшсәләр өс сәғәт эсендә 750 мең һумлыҡ заемға яҙылдылар.

Заемға яҙылыу эшенең ойошоҡан рәүештә башланыуы бер ауыҙ ла тынысланырға, масса араһында политик аңлатыу эшен ойоштороу эштәрен [illegible] бирмәй. Киреһенсә, заем таратыу эше [illegible] бурыстары, большевиктар партияһының политикаһын, 1946 — 1947 йылдарҙа һәм быйылғы йылдың беренсе кварталында өлгәшелгән уңыштары хеҙмәтсәндәргә төрлө рәүештә аңлатып бирергә, партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының ныҡышмалы эш алып барыуҙарын талап итә. Партия-политик һәм ойоштороу эштәре бөтә халыҡтың да заемға яҙылыуында өлгәшеүгә йүнәлдерелергә тейеш. Заемға яҙылыу өсөн агитация алып барыу һәр бер совет кешеһенә уның биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн барған көрәштәге [illegible] хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә, производство планын үтәү һәм арттырып үтәүгә бурысын аңлатыу, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта юғары сифатлы итеп үтәү бурысын аңлатыу, тигән һүҙ.

Заемға берҙәм рәүештә яҙылып, совет халҡы Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен тағы ла күтәреү өсөн [illegible] совет патриотизмының юғары күтәрелешен күрһәтәсәк.

Мәскәүҙә Беренсе Май

Ҡыҙыл Майҙанда хәрби парад һәм хеҙмәтсәндәрҙең демонстрацияһы

Беренсе Май көнөндә—бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең боевой көстәрен смотр көнөндә Мәскәү бөйөк һәм ярһыу шатлыҡлы булды. Бөйөк ҡаланың бөтә урамдарында — Ильич заставаһында, Красная преснялә, Можайск шоссеһендәге яңы йорттар ҡаршыһында һәм Ҙур Калуга урамында — бөтә урамдарҙа ла москвалылар — традицион байрам демонстрацияһында ҡатнашыусыларҙың күп меңләгән колонналары үттеләр. Был көндө бөтә Мәскәү тип әйтерлек данлы совет байрамын билдәләү өсөн урамдарға һәм майҙандарға сыҡты.

* * *

Традицион байрам парадында ҡатнашыусы Мәскәү гарнизонының ғәскәрҙәре иртән иртүк [illegible] тарихи Ҡыҙыл майҙанға табан юнәлделәр. Кремлдең боронғо стеналары янындағы гранит трибуналарға, Ленин мавзолейының ике яғында башҡаланың күренекле кешеләре — СССР Верховный Советы һәм РСФСР Верховный Советы депутаттары, хөкүмәт члендары, ғалимдар, производство, искусство һәм әҙәбиәт деятелдәре, стахановсылар, [illegible] республикаларҙан һәм илебеҙҙең ҡалаларынан килгән ҡунаҡтар йыйылды.

... Ғәскәрҙәр парад алды тынлығында ҡалдылар. Майҙан тынлығында алҡыштар яңғырай... Мавзолей трибунаһына иптәш И. В. Сталин күтәрелә. Овациялар үҫкәндән-үҫә бара. Совет халҡының бөйөк юлбашсыһын хөрмәтләп ҡотлау тауыштары яңғырай. И. В. Сталин менән бер рәттән мавзолейҙың үҙәк трибунаһында В. М. Молотов, А. А. Жданов, Л. П. Берия, К. Е. Ворошилов, Г. М. Маленков, А. И. Микоян, Л. М. Каганович, Н. А. Вознесенский, Н. М. Шверник, А. Н. Косыгин, А. А. Кузнецов, М. А. Суслов, Г. М. Попов иптәштәр күренә.

Кремль курантары унынсы тапҡыр һуҡҡандан һуң Кремлдән СССР Ҡоралы Көстәре Министры, Советтар Союзы маршалы парад ҡабул итеүсе Н. А. Булганин сыға.

Парад командующийы Советтар Союзы маршалы К. А. Мерецковтың рапортын ҡабул иткәс, иптәш Булганин Ҡыҙыл майҙанда һәм уның янындағы урамдарҙа теҙелгән ғәскәрҙәр янына үтә һәм улар менән иҫәнләшә, уларҙы Беренсе Май байрамы менән ҡотлай. Ҡаршылау маршының ҡеүәтле тауыштары «Ура» тауыштары менән ҡушыла.

Ҡыҙыл фанфарист сигнал менән: «Бөтөгеҙ ҙә тыңлағыҙ!» тип белдерә. Иптәш Булганин мавзолей трибунаһына күтәрелә ғәскәрҙәргә, һәм Советтар Союзының хеҙмәтсәндәренә телмәр менән мөрәжәғәт итә.

СССР Ҡоралы Көстәре Министры Советтар Союзы маршалы Н. А. Булганин телмәре

Иптәштәр, һалдаттар һәм матростар, сержанттар һәм старшиналар! Иптәштәр, офицерҙар, генералдар һәм адмиралдар! Ҡоралы Көстәр сафтарынан демобилизацияланған воиндар! Советтар Союзының хеҙмәтсәндәре!

Совет Хөкүмәте һәм Бөтә Союз Коммунистар большевиктар партияһы Үҙәк Комитеты исеменән һәм уларҙың тапшырыуы буйынса һеҙҙе хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара байрамы — Беренсе Май көнө менән ҡотлайым һәм тәбрик итәм.

Беҙҙең халҡыбыҙ халыҡ-ара хеҙмәт байрамын социалистик төҙөлөш фронтында яңы гүзәл уңыштар менән ҡаршылай. Совет кешеләре үҙҙәренең героик хеҙмәттәре менән халыҡ хужалығының һуғыштан һуңғы ҡабаттан төҙөлөшөн тамамланылар һәм һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың тәүге ике йылы планын уңышлы үтәнеләр. Беҙҙең ауыл хужалығыбыҙ тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелде. Хеҙмәтсәндәрҙең материаль яҡтан яҡшы көн-күреше байтаҡ үҫте. Беҙҙең илебеҙҙең фәне һәм культураһы йылдам үҫә бара. Беҙҙең коммунистар партияһы һәм Совет Хөкүмәте етәкселегендә бөтә совет халҡы хәҙер ҙур күтәренкелек менән һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылының государство планын срогынан алда үтәү өсөн көрәшә.

Беҙҙең илебеҙҙә коммунизм төҙөү буйынса бөйөк эште уңышлы рәүештә тормошҡа ашыра барған совет халҡы, хәҙер ҙә элекке кеүек оҙаҡҡа һуҙылған һәм ныҡлы тыныслыҡ менән бик ныҡ ҡыҙыҡһына. Совет халҡы ғәҙел демократик тыныслыҡ өсөн эҙмә-эҙ һәм арымай-талмай көрәшеүсе булды һәм булыуында дауам итә. Совет халҡы һәр ваҡытта ла бөтә милләттәр араһында, уларҙың ҙур йәки бәләкәй милләттәр булыуына ҡарамаҫтан, тыныслыҡ һөйөүсе һәм тиң хоҡуҡлы мөнәсәбәттәрҙе яҡланы һәм яҡлай. Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния, Венгрия, Болгария һәм Финляндия менән дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында беҙҙең хөкүмәтебеҙ тарафынан төҙөлгән договорҙар был турала ышаныслы итеп һөйләйҙәр. Ағымдағы йылда беҙҙең ҡоралы көстәребеҙҙең һанын артабан ҡыҫҡартыу Совет Хөкүмәтенең тыныслыҡ һөйөүсе политикаһы тураһында һөйләй.

Халыҡ-ара империалистар Совет Хөкүмәтенең тыныслыҡ һөйөүсе политикаһына ҡаршы киләләр, улар юғәнһеҙләнеп, һуғыш пропагандаһы алып баралар, хәрби блоктар төҙөйҙәр, ҡоралдарҙы арттыралар һәм ярашыу договорҙары, килешеүҙәр буйынса алынған йөкләмәләрҙең үтәлеүен өҙәләр.

Советтар Союзы үҙенең тыныслыҡ өсөн булған көрәшендә ялғыҙ түгел. Тормош беҙҙең юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталиндең, бөтә илдәрҙең халыҡтары һуғыш теләмәйҙәр, тыныслыҡ яҡлы кешеләрҙең лагеры үҫә һәм ныҡый тигән һүҙҙәренең тәрән дөрөҫлеген раҫлай. Шуның менән бергә, тыныслыҡ яҡлы кешеләр тыныслыҡ һөйөүсе государстволарҙың артабан ла бер-береһе менән ныҡ бәйләнгән булһалар һәм тыныслыҡ өсөн актив көрәштә үҙҙәренең көстәрен тағы ла нығыраҡ арттырһалар ғына, тыныслыҡ менән файҙалана аласаҡтары тураһында хәтерҙәрендә тоторға тейештәр.

Иптәштәр! Беҙҙең илебеҙҙең уңыштары бик ҙур. Ләкин совет халҡы һәм уның Ҡоралы Көстәре алдында тороусы бурыстар ҙа бынан бәләкәй түгелдәр.

Быйыл совет кешеләре биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүҙе тәьмин итеүсе хәл иткес уңыштарға өлгәшергә тейештәр. Эшләп сығарыу һәм хеҙмәт етештереүсәнлеге темптарын тағы ла нығыраҡ күтәрергә, юғары урожайға өлгәшергә, фәнде, техниканы һәм культураны алға ебәрергә, хеҙмәтсәндәр тормошоноң материаль һәм культура кимәлен күтәрергә, беҙҙең халҡыбыҙҙа совет патриотизмы тойғоһон үҫтерергә һәм нығытырға һәм кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү өсөн ныҡлы рәүештә көрәшергә кәрәк.

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең государство интерестарын һаҡлау өсөн саҡырылған совет воиндары совет хәрби фәне һәм хәҙерге заман техникаһы өлгәшеүҙәре нигеҙендә үҙҙәренең хәрби мастерлыҡтарын арымай-талмай камиллаштырырға тейештәр.

Иптәштәр! Беҙҙең юл дөрөҫ һәм асыҡ. Ул бөйөк ленинизм идеялары менән яҡтыртылған. Большевиктар партияһы һәм бөйөк Сталин беҙҙе ошо юл буйынса ышаныслы рәүештә алып баралар.

Совет халҡы һәм уның ҡоралы көстәре үҙҙәре алдында торған бөтә бурыстарҙы намыҫ менән үтәйәсәктәре тураһында бер ниндәй ҙә шик юҡ.

Йәшәһен Беренсе Май — бөтә илдәр хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнө!

Йәшәһен героик совет халҡы һәм беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен данлы Совет Ҡоралы көстәре!

Йәшәһен Совет Хөкүмәте!

Йәшәһен Бөтә Союз Коммунистар большевиктар партияһы!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы, беҙҙең юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ Бөйөк Сталин!

Ура!

* * *

Советтар Союзы гимны яңғырай. Оркестр тауыштарына Кремль пушкалары артиллерияның байрам салюттары менән яуап бирҙеләр.

Йөҙ фанфарист һәм барабансы парадты башлай. Иң өлкән хәрби академияларҙың береһе, начальнигы генерал-полковник Цветаев булған, Ленин орденле һәм I дәрәжәлеге Суворов орденле, М. В. Фрунзе исемендәге Ҡыҙыл Байраҡлы хәрби Академия тантаналы марш башлай. Унан һуң Ф. Э. Дзержинский исемендәге, Ленин орденле һәм беренсе дәрәжәлеге Суворов орденле артиллерия Академияһында, И. В. Сталин исемендәге, Ленин орденле бронетанковый һәм механизациялаштырылған ғәскәрҙәр хәрби Академияһында, Ҡыҙыл Байраҡлы хәрби-һауа Академияһында, В. И. Ленин исемендәге, Ҡыҙыл Байраҡлы, Ленин орденле хәрби-политик академияла тәрбиәләнеүселәр үттеләр. Уларҙың уҡыусылары Ҡыҙыл майҙанға еңеү юлдары менән килделәр.

Академияларҙың байраҡтарын иң яҡшы уҡыусылар — Советтар Союзының өс тапҡыр Геройы гвардия полковнигы А. Покрышкин һәм гвардия майоры И. Кожедуб, летчиктар, артиллеристар, танкистар, пехотинецтар алып баралар.

Парадта ҡатнашыусылар араһында Бөйөк Ватан һуғышының данлы хәрби-ветерандарын күрәбеҙ.

Мавзолей янынан, көслө алҡыштар аҫтында Жуковский исемендәге, Куйбышев исемендәге, Ворошилов исемендәге академияларҙың, ситтелдәр хәрби институтының уҡыусылары, пехота һәм пограничный училищеларҙа тәрбиәләнеүселәр марш менән үттеләр.

Пехотинецтар, хәрби моряктар, суворовсылар, нахимовсыларҙың маршын трибуналарҙа иғтибар менән ҡарайҙар.

Пехота маршы бөткәндә тарихи музей манаралары өҫтөнән дүрт истребитель оҙатыуында дүрт моторлы ҡеүәтле бомбардировщик күренә. Был һауа парадын асыусы флагман самолеты, уны авиация генерал-майоры В. И. Сталин алып бара.

Бик ҙур һауа армадаһы тамашасылар башы өҫтөнән тиҙлек менән үтә. Истребителдәр, штурмовиктар, бомбардировщиктар, реактив самолеттар йылғыр, гүзәл, еңел манёврле ҙур ут ҡеүәте булған йөҙәрләгән машиналар.

Берҙәм ритмға буйһоноп Советтар Союзы Геройы генерал-лейтенант Асликовскийҙең кавалерия төркөмө майҙанға баҫа. Был һыбайлылар дошман тылдарында ҡыйыу рейдтарға ҡатнашыусылар. Кавалеристарҙан һуң артиллерия, пулемет эскадроны, тачанкалар үтә.

(Аҙағы 2-се биттә).

Өфө хеҙмәтсәндәре Беренсе Май демонстрацияһында. В. Жданов фотоһы.

Мәскәүҙә Беренсе Май

Ҡыҙыл Майҙанда хәрби парад һәм хеҙмәтсәндәрҙең демонстрацияһы

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

... Еңел, әсто асыҡ, автомашина «ЗИС—110» ҙур тиҙлектә бара. Машинаһы эсендәге, боевой Ҡыҙыл Байраҡлы, Суворов орденле, Таманск дивизияһына етәкселек итеүсе, Советтар Союзы Геройы генерал-майор Комаров был машинала бара. Ул дивизия обороналарҙа ла ныҡ торҙо, һөжүмдә лә арымай-талмай алға барҙы.

Унан һуң генерал-майор Копычконың «Ҡанатлы пехотаһы» һауа—десант частәре үтә. Был часть дошмандың 11 танк дивизияһын ыҙыратыуҙа ҡатнашҡайны. Полк биҙ күп геройҙар тәрбиәләне.

Генерал-лейтенант Рябовтың артиллерия колоннаһы майҙанға инә. Һәм парадта булыусы Ҡунаҡтар—инженерҙар, техниктар, эшселәр—дивизиондарҙың, полктарҙың, колонналарҙың отличный техник байҙығында — яңы тягачтарҙа, машиналарҙа, тракторҙарҙа, яңы эшләнгән агрегаттарҙа — үҙ хеҙмәттәренең һөҙөмтәһен күрәләр.

Дан алған гвардия миномёттәре «Катюшалар». Һуғыш ваҡытында бер орминиҡ да быудай дошмаҡҡа ҡурҡыу булмаҡы. «Катюшалар» тауыҡы, ҡайҙа бәк автомобилдарҙа ҡуйылғандар. Шулай уҡ яңы тыны булған ғатырҙарыҡлы машиналарҙа айырым кеүәтле ораудтар урынлаштырылған. Юғары сифатлы ныҡ автомобиль—«газ—51»—промышленносты Совет Армияһы торпомоһына ла ике Уҙған йылғы парадта техник комплекталары, матур «ЗИС—150» машинаһын күрсәткәйне. Ул инде армияла үҙенә яҡшы исем ҡаҙанды, ҡурҡыу ирлегенә лә өлгөшкән. Хәҙер, 1948 йыл парадында тағы ла кеүәтләрәк ес күреүҙә бытә ерҙә бәрен торған «ЗИС—151» машинаһы бар. Ул «студебеккерҙан» һәм сит ил маркаһындағы башҡа машиналарҙан байтаҡ яҡшы. Һәм, ауыр кисел, биҡ кеүәтле, отличный техник күрһәткестәре булған совет машинаһы «ЯАЗ—200» машинаһы булырҙайҙы.

Бронетанк ғәскәрҙәренең майҙан ин үтеүе мәһәбәт күренешкә әйләнде. Трибуналағы күп һанлы ҡунаҡтар ҡоралы кестәрҙе тантаналы алҡышланылар. Большевиктар партияһы һәм бөйөк Сталин тарафынан тәрбиәләнгән данлы Совет Армияһы үҙенең боевой байраҡтарын Бөйөк Ватан һуғышында дан менән алып барҙы.

Тыныслыҡ һаҡсыла беҙҙең вондәребеҙ Тыуған илебеҙҙең ныҡыселеген һаҡлауға уяу торалар, совет халыҡтарының тыныс ижади хеҙмәтен һаҡлайҙар.

* * *

Бәләкәй интервал, бер минут тынлыҡ—һәм майҙанға демонстранттарҙың байрам колонналары инәләр. Иң алда — Мәскәү предприятиеларынан мен кешенән торған кеүәтле оркестр, районҙарҙың ал байраҡтар күтәргән байраҡ йөрөтөүселәре. Ирекле спорт обществоларының утыҙ меңлә физкультурниктар колоннаһы...

Мәскәү заводтары һәм фабрикалары, учреждениелары, ғилми-тикшеренеү институттарының күп кешеле коллективтары үҙҙәренең тыныс хеҙмәт өлкәһендә булған уңыштары турәһында рапорт бирер өсөн бөгөн Ҡыҙыл майҙанға килделәр.

Сталин исемендәге районның колоннаһы башында заводтар һәм фабрикаларҙың иң яҡшы кешеләренән йөҙ байраҡ йөрөтөүсе бара. Беренсе Май байрамының шатлыҡлы көнендә район хеҙмәтсәндәренең илгә әйтер һүҙҙәре бик күп. Март айында уҡ Сталин районы промышленносе продукция етештереү буйынса һуғышҡа тиклемге кимәлгә күтәрелде. Дүрт айлыҡ план срогынан алда үтәлде. Күп предприятиелар Беренсе Май байрамына биш айлыҡ заданиеһын тамамланылар һәм июнь программаһы иҫәбенә эшләйҙәр.

Демонстранттар өҫтөндә яҡты йондоҙ булып илле ҙур электрик лампалары тоҡанлырыла. Был — лампалар заводының продукцияһы. АТЭ заводы коллективе яңы стартерҙарын һәм генераторҙарын, трансформаторҙар заводының эшселәре — яңы тип трансформаторҙарын демонстрациялайҙар.

Төрлө төҫтәге ваҡ флагтар, матур байраҡтар, яҙғы сәскәләр менән урәтелгән 6 ҙур панно күтәрелеп тора. Уларҙа беҙҙең халҡыбыҙҙы еңеүҙәрҙән-еңеүҙәргә алып барыусы кешенең, уның исеме һәр бер совет кешеһе тарафынан һөйөп әйтелә торған юлбашсының образы кәүҙәләндерелгән. Сталин граждандар һуғышы йылдарында Царицын фронтында, Сталин тәүге биш йыллыҡтар төҙөлештәрендә, Сталин Ватан һуғышы фронттарында — был паннолаҙың темаһы шундай.

Мәскәүҙең һәр бер районының үҙенең йөҙө, тик үҙенә генә хас булған айырым профиле бар. Колоннаһы майҙанға килеп ингән Первомайск районының йөҙөн илебеҙҙең күренекле «Серп и молот» металлургия заводы Беренсе социал-демократик түңәрәктәрҙән һәм революцион мәскәүлеләрҙән алып ҙур революцион традицияларға бай булған завод билдәләй. Матур итеп биҙәлгән ҙур панно — Тыуған илгә рапорт панноһы — Мәскәү металлургтарының производство еңеүҙәре турәһында һөйләй. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың тәүге йыл һәм дүрт айында улар планда тыш 27.600 тонна юғары сифатлы ҡорос һәм 8.700 тонна прокат бирҙеләр. Дүрт айлыҡ план 21 апрелдә үтәлде.

Ленин районы өсөн — илебеҙҙә билдәле булған «Красный пролетарий», Орджоникидзе исемендәге, «Станкоконструкция» һәм башҡа станоктар төҙөү заводтарына бай булған район хас.

Районды хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең тыныс, ижади хеҙмәт фронтында еңеүҙәре турәһында Беренсе Май Мәскәүгә рапорт бирәләр. Үткән йылдың аҙағында уҡ инде район промышленносе һуғышҡа тиклемге кимәлдә 15 процент самаһына үтеп китте. Дүрт айлыҡ план срогынан алда үтәлде, ә күп завод һәм фабрикалар байрам көненә 5 айлыҡ программаны үтәнеләр. «Красный пролетарий» заводы коллективе Беренсе Майға бүләк итеп нерв матур ... заводы ... бик күп ...

Федор Анатольевич ...

Пролетар һәм Таганск районының хеҙмәтсәндәрен байрам колонналары Мәскәүҙең Октябрь тарафында ... демонстранттар ... хеҙмәтсәндәрҙең бөтә байкелгән демонстрациялайҙар.

Таганск районында 120 самаһы предприятие иҫәпләнә, улар араһында Каганович исемендәге 1-се государство подшипник заводы, бәләкәй литражлы автомобиль заводы, Микоян исемендәге ит комбинаты, 1-се номерлы сәғәт заводы һәм башҡалар күрек ҙур предприятиелар бар.

Пролетар районы дүрт айлыҡ программаны срогынан тугыҙ көн алда үтәне. Хеҙмәт етештереүсәнлегенең һуғышҡа тиклемге кимәле күп артта ҡалды. Районың меңдәрсә стахановсылары инде 1950 йыл нормаһы буйынса эшләйҙәр. Бөтә илебеҙгә билдәле булған Сталин исемендәге автозавод эшселәренең, инженер-техниктарҙың колоннаһы өҫтөндәге панно һәм транспаранттар билдәһуралы асыҡ һөйләйҙәр. Автозаводсылар дүрт айлыҡ программаны башҡалала беренселәрҙән булып үтәнеләр һәм йыл башынан алып 11 миллион һумдан артыҡ файҙа бирҙеләр.

Молотов районы хеҙмәтсәндәренең колоннаһы «Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ» темаһына бәйләнгән. Демонстранттар алып барған мәһәбәт байраҡтар араһында беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе, промышленностебеҙҙең елгәшеүҙәрен күрһәтеүсе һандар, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүгә саҡырған плакаттар, районның данлы стахановсыларының портреттәре бар.

* * *

Мәскәүлеләрҙең — эшселәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең, интеллигенцияның — Ҡыҙыл майҙан аша бөйөк шествиеһе дүрт сәғәттән артыҡ дауам итте. Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың данлы ваҡытында тороусы Мәскәү хеҙмәтсәндәре Беренсе Май байрамы демонстрацияһында большевистик партияның:

— Ленин байрағы аҫтында, Сталин етәкселегендә алға, коммунизм еңеүенә! тигән ялҡынлы саҡырыу һүҙҙәрен ғорурлыҡ менән алып үттеләр.

Беренсе Май демонстрацияһында миллиондан артыҡ кеше ҡатнашты.

* * *

Ватаныбыҙҙың башҡалаһы Мәскәү Беренсе Май көнөн тантаналы һәм шатлыҡлы рәүештә байрам итте.

Урамдар, майҙандар һәм бульварҙар иртәнән алып төнгә тиклем меңдәрсә мәскәүлеләр менән тулы булды. Башталаның иштарында күп халыҡлы гүләнеләр булып үтте.

Беренсе Май хөрмәтенә киске 9 сәғәттә бирелгән артиллерия салютының кеүәтле залптары ҡала өҫтөндә күкрәп торҙолар. Киске фейерверктарҙың төрлө төҫтәге уттары һауаға күтәрелделәр.

(ТАСС).

1948 йылдың 3 майында СССР Министрҙәр Советы тарафынан расланды

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу шарттары

1. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы 1948 йылдың 1 октябренән алып 1968 йылдың 1 октябренә тиклем срок менән сығарыла.

2. Заем тик халыҡ араһында урынлаштырыу өсөн генә билдәләнә. Заемды урынлаштырыу тәртибе СССР Финанс Министерствоһы тарафынан билдәләнә.

3. Заем разрядтарға бүленә, һәр бер разрядта 100 миллион һум бар.

Һәр бер разряд 20000 сериянан тора. Һәр бер разряд серияһының 40301 номерҙан башлап 60000-гә тиклем номере була.

Һәр бер серияла облигацияның 1-ҙән алып 50-гә тиклем номере була.

4. Облигация 500, 200, 100, 50 һәм 25 һумлыҡ итеп сығарыла.

500 һәм 200 һумлыҡ облигациялар бер серияның бөтә йәки ике номерҙе йөҙөр һумлыҡ бер йәки ике облигацияларға тиңләштерелә. Һәр бер серияның йәки һәр номеры һәр бер номерҙе йәки ваҡытта сыға торған бөтә йәки ике отош алыусы булып ҡала.

50 һум 25 һумлыҡ облигацияларҙың бер номеры облигациянан тороп тиражда ... һәм ... отошында ... ½, ¼ өлөшө ... бирелә.

Иҫкәрмә: 50 һум 25 һумлыҡ облигацияларҙы подписка суммаһы буйынса ҙурыраҡ суммаларға облигациялар бирергә мөмкин бул маған хәлдәрҙә генә подписчыларҙа менән иҫәп йәһәу өсөн билдәләнгәндәр.

5. Заем облигациялары буйынса бөтә доход отош формаһында түләнә.

Отоштарҙың дөйөм суммаһы уртаса алғанда заемдың 20 йыллыҡ срогы эсендә йылына 4 процент иҫәбенән билдәләнә.

Заемдың 20 йыл срогы эсендә бөтә облигацияларҙың 1/3 өлөшө ота, ә облигацияларҙың ҡалған 2/3 өлөшө үҙҙәренең нарицательный хаҡтары буйынса түләп алыналар.

Отҡан облигациялар түләп алына һәм артабанғы тираждарҙан сығарылып ташлана.

Заем буйынса отоштар йөҙ һумлыҡ облигацияға 50000, 25000, 10000, 5000, 1000, 500 һәм 200 һум күләмендә билдәләнә, был суммаға облигацияның нарицательный хаҡы ла (йөҙ һум) индерелә.

6. Заемдың 20 йыллыҡ срогы эсендә 40 отош тиражы — йылына ике тираж үткәрелә.

Отош тираждары 1949 йылдан алып СССР Финанс Министерствоһы тарафынан билдәләнгән сроктарҙа үткәрелә.

7. Һәр бер отош тиражында заемдың һәр бер разрядында йәгни һәр бер 100 миллион һумына түбәндәге һанда отоштар уйнала:

Облигацияның нарицательный хаҡтарын да куһып 100 һумлыҡ облигацияға отоштар күләме	Отоштар һаны: 1—10 тираждарҙа һәр береһендә уйнала	11—20 тираждарҙа һәр береһендә уйнала	21—30 тираждарҙа һәр береһендә уйнала	31—40 тираждарҙа һәр береһендә уйнала	Барлыҡ 40 тираждың бөтәһендә һәр бер 100 миллион һумға бөтәһе уйнала
50.000 һум	1	1	1	1	40
25.000 һум	2	2	2	2	80
10.000 һум	5	5	5	5	200
5.000 һум	10	10	10	10	400
1.000 һум	100	100	100	100	4000
500 һум	1000	1000	1000	1000	40000
200 һум	7407	7257	7007	6757	285280
Отоштарҙың дөйөм һаны	8525	8375	8125	7875	330000
Отоштарҙың дөйөм суммаһы (һумдарҙа)	2.301.400	2.251.400	2.201.400	2.151.400	89.056.000

8. Отмаған облигациялар 1953 йылдың 1 октябренән алып заем срогының аҙағына тиклем ҡалған 15 йыл эсендә үҙҙәренең нарицательный хаҡтары буйынса түләп (һатып) алыналар.

Заемдың һәр бер 100 миллион һумынан 1953—1958 йылдарҙа йыл һайын 2.500.000-әр һум, 1959—1963 йылдарҙа 4.200.000-әр һум, 1964 — 1968 йылдарҙа 6.200.000-әр һум һатып алына.

1953—1967 йылдарҙа һатып алынырға тейешле облигациялар йыл һайын үткәрелә торған түләү тираждары менән билдәләнә; түләү тираждарын үткәреү сроктары СССР Финанс Министерствоһы тарафынан билдәләнә.

Түләү тираждарында сыҡмаған облигациялар 1968 йылдың 1 октябренән һатып алыналар.

9. Отош сыҡҡан облигациялар, шулай уҡ нарицательный хаҡы менән һатып алынырға тейешле облигациялар 1969 йылдың 1 октябренә тиклем түләү өсөн тапшырылыуы мөмкин, был срок үткәс түләү өсөн тапшырылмаған облигациялар кестәрҙән юғалталар һәм түләп алынмайҙар.

СССР Финанс Министре А. КОСЫГИН

РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ ХЕҘМӘТСӘНДӘРЕ ЯҢЫ ЗАЕМҒА БЕРҘӘМ ЯҘЫЛАЛАР

Ҙур шатлыҡ менән

8-се март исемендәге фабрика коллективе яңы заем сығарылыу турәһындағы хәбәрҙе ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланы.

— Мин, — тине 4-се цехта эшләүсе йәш ҡеңә тегеүсе иптәш С. Гирфанова, — государствоның яңы заемы беҙҙең илебеҙҙең халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн, илебеҙҙең ҡеүәтен тағы ла ныҡыраҡ арттырыу һәм хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрешен тағы ла яҡшыртыу өсөн кәкәлегән бик яҡшы аңлайым. Шуға күрә мин бер айлыҡ эш хаҡыма заемға яҙылам.

Унан һуң 4-се цехта эшләүсе тегеүсе комсомолка иптәш Мосина Турьянова һүҙ алып, үҙенең бер айлыҡ эш хаҡына заемға яҙылыуы турәһында әйтте.

Цех механиге иптәш Ғ. Әхмәтьянов, 3-сө цехтың начальнигы иптәш Е. Викторова берәр айлыҡ эш хаҡтарына заемға яҙылдылар.

1-се цехтың начальнигы иптәш А. Шевкунова 1000 һумға (уның айлыҡ эш хаҡы 790 һум) яҙылды.

Заемға яҙылыу ҙур ойошҡанлыҡ менән бара.

Бер сәғәт ваҡыт эсендә бөтә фабрика буйынса 242 мең 90 һумлыҡ заемға яҙылдылар. Подписка дауам итә.

Р. Еңгалычева.

Тәүге бер сәғәттә

Өфө механика заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре хөкүмәтебеҙҙең яңы заем — СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу турәһындағы ҡарарын ҙур политик күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Был хәбәр радио аша тапшырылыу менән заводтың цехтарында ҡыҫҡа ғына митингыларҙан һуң, эшселәр шунда уҡ заемға берҙәм рәүештә яҙыла башланылар.

Заводта заемға беренсе булып штамплау цехы эшселәре яҙылдылар. Цехтың стахановсылары штамповщик Сәләхетдинов 900 һумға, слесарь Никифоров бер мең һумға яҙылды. Цех начальнигы иптәш Шкирин айлыҡ хеҙмәт хаҡы күләмендә—бер мең һумға яҙылды.

Эшселәрҙең күпселеге государствобыҙға үтескә дүрт аҙналыҡ хеҙмәт хаҡтарын бирәләр. Тәүге бер сәғәт ваҡыт эсендә 116 кеше яҙылып, государствобыҙға 65 мең һумдан артығыраҡ һаҡлыҡтарын бирҙеләр.

Г. Ә.

Аҡсалата 150 мең һум взнос индерелде

БӨРӨ. Киске сәғәт 10-ға ҡала хеҙмәтсәндәре бер миллион 200 мең һум подписка бирҙеләр. Районың 8 ауыл Советында 250 мең һумлыҡ заем таратылды. Колхозсылар подписка иҫәбенә аҡсалата 150 мең һум взнос индерҙеләр.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемының 100 һумлыҡ облигацияһы.

ТАСС фотохроникаһы.

Берҙәм подписка

Радио халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы сығарылыу турәһында хәбәр килтерҙе.

Агрегат заводы эшселәре һәм инженер-техник работниктәре был хәбәрҙе ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алдылар, һәм шунда уҡ ҙур цех залында яңы заем сығарыуға арналған митинг булды.

Митингыны завком председателе иптәш Солуянов аса. Иптәш Гельченко государство заемдарының илебеҙҙең ҡеүәтен үҫтереүҙә тотҡан мөһим роле турәһында һөйләй һәм завод коллективен берҙәм рәүештә яңы заемға яҙылыуға саҡыра.

Трибунаға бер-бер артлы заводтың стахановсылары, инженер-техник работниктәре күтәреләләр һәм улар яңы государство заемы сығарылыуын бер күңелдән тәбрик иттеләр.

Стахановсы лекальщик иптәш Елеәрьев:

— Беҙҙең государство заемына биргән аҡсаларыбыҙ илебеҙҙең тағы ла ҡеүәтле, беҙҙең тормошобоҙҙоң тағы ла яҡшыраҡ булыуы өсөн хеҙмәт итә. Мин айына 1200 һум хеҙмәт хаҡы алам һәм яңы заемға 1500 һум күләмендә яҙылам, — тине.

Митингынан һуң уҡ цехтарҙа берҙәм рәүештә заемға подписка башланды. Социалистик ярышта алдынғы урынды алып килеүсе агрегат заводы коллективе яңы заемға яҙылыуҙа ла ҙур ойошҡанлыҡ күрһәтте.

Подписка башланыуға бер сәғәт үтеүгә бөтә коллективтең 80 проценттан артығыраҡы яңы заемға яҙылды.

Бер инструменталь цех эшселәре генә бер сәғәт эсендә яңы заемға 140 мең һумға подписка оформить иттеләр. Айырым эшселәр взностарҙы шунда уҡ аҡсалата индереүгә теләк белдерҙеләр. Эшсе строгальщик Афанасьев яңы заемға 1000 һум күләмендә яҙылып шунда уҡ 500 һумын аҡсалата индерҙе.

Б. Сафин.

Ватаныбыҙҙың даны өсөн

Өфө электрооборудование заводында хөкүмәтебеҙҙең яңы заем сығарыу турәһындағы ҡарары ҙур рухлылыҡ менән ҡаршыланды. Ошо айҡанлы бөтә цехтарҙа митингтар булып үтте. Эшселәр үҙҙәренең сығыштарында совет государствоһын артабан нығытыу, совет халҡының тормошон яҡшыртыу турәһындағы хәстәрлек өсөн партияға һәм хөкүмәтебеҙгә, бөйөк Сталинға ҙур рәхмәт белдерәләр. Совет заемдары — үҙ һаҡлыҡтарын Ватаныбыҙҙың даны өсөн биреүсе совет кешеләре патриотизмының асыҡ кәүҙәләнеше ул.

Митингыларҙан һуң бөтә цехтарҙа ла ҙур активлек менән заемға яҙылыу башланды. Ныйнау цехында беренсе булып йәш эшсе иптәш Иванов үҙенең айлыҡ хеҙмәт хаҡынан байтаҡ артыҡ итеп яҙылды. Стахановсы иптәш Гончаров 1200 һум, иптәш Яковлева ике айлыҡ хеҙмәт хаҡын государствоға үтескә бирҙе.

Киске сменала эшләүсе эшселәрҙең күпселек өлөшө тәүге бер нисә минут эсендә уҡ яҙылып бөттө.

Заемға яҙылыу дауам итә.

К. Крылов.

Биш йыллыҡты дүрт йылда

— Биш йыллыҡ планды — дүрт йылда!

Беренсе Май байрамын айлыҡ производство планын 113 процентҡа үтәп ҡаршылаған ПРЗ-ның Тендер цехында яңы заемға яҙылыу бына ошо лозунг аҫтында үтте.

Цехтың алдынғы стахановсыларынан ҡарт эшсе Александр Яковлевич Козлов айлыҡ эш хаҡының 110 процентына, йәш слесарь Морозов 120 процентына яҙылды. Токарь Бикбулатов, слесарь Исламов, котельщик Байбурин һәм башҡа күп иптәштәр айлыҡ эш хаҡы суммаһына яҙылдылар.

Цехта 118 эшсе. Шуларҙан беренсе һәм икенсе сменала эшләүселәрҙең бөтәһе лә подписканың тәүге сәғәтендә уҡ яҙылып бөттөләр. Бер сәғәт ваҡыт эсендә дөйөм цех эшселәренән 83 проценте подпискаға ылыҡтырылды.

— Хәҙер өсөнсө сменала подписка дауам итә, — ти цех партия ойошмаһы секретаре иптәш Ильин.

Заводтың стахановсы Арматур цехы коллективендә подписка ғәйәт ҙур күтәренкелек менән үтте. Слесарь Малышев айлыҡ хеҙмәт хаҡы 900 һум булыуға ҡарамаҫтан, 1.100 һумға яҙылды. Токарь Шәрәфетдинов, слесарь Нестеров, мастер Федянин иптәштәр ҙә айлыҡ хеҙмәт хаҡынан күберәк суммаға яҙылдылар.

Был цехта тәүге сәғәттә уҡ эшселәрҙең 91 проценте подпискаға ылыҡтырылды һәм был ваҡыт эсендә заем подпискаһының суммаһы цехтың дөйөм эш хаҡы фондының 98 процентын тәшкил итте.

3 майҙа киске сәғәт 7-гә тиклем дөйөм ПРЗ-ның эшселәренең 62 проценте подпискаға ылыҡтырылды.

— Беҙҙең заводыбыҙ эшселәре, сталинсе бөйөк биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн үҙҙәренең кәстәрен һәм хеҙмәттәрен йәлләмәгән кеүек, государствобыҙға үҙ средстволарын заемға биреүҙә лә патриотик өлгөләр күрһәтәләр, — ти ПРЗ партия комитеты секретаре иптәш Е. А. Мизонов.

Ф. Бикбов.

КОЛХОЗСЫЛАР БЕРҘӘМ ЯҘЫЛАЛАР

ШИШМӘ. (Телефон аша). Яңы заем сығарылыу турәһындағы ҡарар колхозсылар тарафынан ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алынды. Был айҡанлы бөтә колхоздарҙа ла күп халыҡлы митингылар булды.

Тәүге дүрт сәғәт эсендә 16 ауыл Советындағы колхоздарҙа 104 мең һумлыҡ подписка ҡабул ителде һәм шунын 54 мең һумы аҡсалата индерелде.

«Яңы тормош» ауыл хужалығы артелендә заемға яҙылыу тулыһынса тамамланды. Колхозсылар подписка суммаһының 75 процентен аҡсалата индерҙеләр.

СССР Совхоздар Министерствоһының Башҡорт АССР-ындағы совхоз работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумының УКАЗЫ

СССР Верховный Советы Президиумының 1947 йыл 29 март Указына ярашлы рәүештә, 1947 йылда совхоздар государствоға ауыл хужалығы продукттарын тапшырыу планын үтәгән һәм 1948 йылды яҙғы сәсеү өсөн бөртөклө ашлыҡ культуралары орлоҡтары менән тулыһынса тәьмин ителгән хәлдә, бойҙайҙан һәм арыштан юғары урожай алған өсөн түбәндәге кешеләрҙе ордендәр һәм медалдәр менән наградларға:

Ленин ордене менән

1. Иван Захарович **Арютинде** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының өлкән механигы, 118 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,49-ар центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

2. Никита Николаевич **Бабковты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең управляющийы, 50 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,4-әр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

3. Мөбәрәк Мөсәлим улы **Курамшинде** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозы директоры, 118 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,49-ар центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

4. Иван Трофимович **Сахаровты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының звеноводы, 50 гектар майҙандың һәр гектарынан 26,4-әр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән

1. Михаил Иванович **Алушкинде** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең управляющийы, 50 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,2-шәр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

2. Михаил Александрович **Варламовты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының өлкән агрономы, 81 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,74-әр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

3. Николай Никитович **Вождаевты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының звеноводы, 22,86 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,92-шәр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

4. Иван Петрович **Денисовты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының өлкән механигы, 81 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,74-әр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

5. Прасковья Дмитриевна **Коняеваны** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының өлкән агрономы, 100 гектар майҙандың һәр гектарынан 23,62-шәр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

6. Петр Афанасьевич **Лапоновты** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры, 65 гектар майҙандың һәр гектарынан 25,9-ар центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

7. Василий Романович **Логвинде** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының директоры, 81 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,74-әр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

8. Сергей Гаврилович **Павловты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының звеноводы, 50 гектар майҙандың һәр гектарынан 21,2-шәр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

9. Хәмит Мөғим улы **Хөснөтдиновты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры, 81 гектар майҙандың һәр гектарынан 20,74-әр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

10. Иван Григорьевич **Чикотаны** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры, 53 гектар майҙандың һәр гектарынан 27,1-әр центнер арыш урожайы алғаны өсөн.

11. Андрей Александрович **Шумковты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының директоры, 100 гектар майҙандың һәр гектарынан 23,62-шәр центнер бойҙай урожайы алғаны өсөн.

8. Иван Григорьевич **Лаушкинде** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

9. Татьяна Григорьевна **Лаушкинаны** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

10. Николай Федотович **Макаренконы** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең механигы.

11. Григорий Никифорович **Мартыновты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең механигы.

12. Карп Антонович **Марченкоы** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының комбайнеры.

13. Григорий Константинович **Носковты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

14. Василий Корнеевич **Пожеванныйҙы** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

15. Петр Федорович **Пугачевты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының звеноводы.

16. Иван Алексеевич **Ростовты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең управляющийы.

17. Николай Васильевич **Тереховты** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

18. Василий Николаевич **Тимофеевте** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

19. Мингужа Имәгол улы **Юмагуловты** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының комбайнеры.

„Хеҙмәт батырлығы өсөн" медале менән

1. Егор Григорьевич **Акульчевте** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

2. Алексей Захарович **Арютинде** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының трактор бригадаһы бригадиры.

3. Зәбирә Ҡотлояр ҡыҙы **Иҡсанованы** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

4. Михаил Георгиевич **Кобецте** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының трактор бригадаһы бригадиры.

5. Владимир Павлович **Коржанинде** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең полеводы.

6. Александр Андреевич **Кротковты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының комбайнеры.

7. Алексей Емельянович **Кротковты** — «Спартак» сусҡасылыҡ совхозының тракторисы.

„Хеҙмәт отличиеһе өсөн" медале менән

1. Иван Семенович **Банновты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы бүлексәһенең механигы.

2. Хәмиә Ғәлиәхмәт ҡыҙы **Дельмөхәмәтованы** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

3. Владимир Михайлович **Малыхты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

4. Нәғим Ҡотлояр улы **Минияровты** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

5. Нина Васильевна **Родинаны** — Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозының эшсеһе.

6. Макар Андреевич **Смолянковты** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

7. Егор Гаврилович **Филькинде** — Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының тракторисы.

8. Федор Иванович **Шетинде** — Стәрлетамаҡ бөртөклө ашлыҡ совхозының комбайнеры.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе
Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретары
А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль. 29 апрель, 1948 йыл.

Һал ағыҙыуҙы ойошҡан рәүештә, юғалтыуһыҙ үткәрергә

Республиканың урман промышленносы эшселәре һәм күп кенә райондарҙың колхозсылары көҙгө-ҡышҡы осорҙа бик күп ағас ҡырҡтылар һәм уларҙы йылғалар буйына ташып ҡуйҙылар. Хәҙер [illegible]

Быйыл һалсылар алдында торған бурыстар айырыуса яуаплы. Беренсенән, эш күләме бик ҙур. [illegible]

[illegible] лау машиналарына ҡайыштар етешмәй. Күп урында эшселәргә аҙыҡ-түлек, промышленность тауарҙары һатыу, декем туҡланыу эшен ойоштороу ҡәнәғәтләнерлек түгел. Культура яғынан хеҙмәт [illegible]

[illegible] работниктәре менән урман эшселәре араһында берҙәм эшләү талап ителә.

Үҙған йыл ағасты һаллап ағыҙыуҙың үҙенә төшөү хаҡы ҡиммәт булды. Ағымдағы навигация сезо[illegible]

[illegible]

Ағиҙел пароходствоһы работниктәренә [illegible]

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Беренсе Майҙы ҙур күтәренкелек менән байрам иттеләр

Өфөлә 1 Май демонстрацияһы

Кәс һәм берҙәмлек тантанаһы

Байрам демонстрацияһы ҡала мәктәптәре уҡыусылары колонналарының хәрәкәте менән башланды. Күңелле йыр менән, тантаналы лозунгылар менән урам яңғыратып, бөтә иғтибарҙы үҙҙәренә ҡаратып 11-се мәктәптең уҡыусылары хөкүмәт трибунаһы эргәһенән үттеләр. Оркестрҙың тәүге аккордтары аҫтында әйтелгән беренсе һүҙҙәр бәхетле балалыҡ биреүсе, йәш быуындың киләсәге тураһында атайҙарса хәстәрлек күреүсе бөйөк кешегә арналған ине:

— Иләһеҙ халыҡтар юлбашсыһы даһи Сталин!

Бер-бер артлы теҙелеп үтеүсе 6-сы, 27-се, 12-се һәм башҡа мәктәптәрҙең уҡыусылары ла шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡабатлайҙар.

Тантаналы ауаздарҙы дауам иттереп, ал байраҡтар балҡыуы менән асфальт урамдарға яңы йәм, яңы төҫ биреп Молотов районы хеҙмәтсәндәренең колонналары трибуна майҙанына яҡынлаштылар. Иң алда — Өфө паровоздар ремонтлау заводының эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре. Советтар Союзының ҙур гербы демонстранттар берҙәмлегенең символы булып балҡый һәм транспаранттарҙағы портреттар юлбашсыларыбыҙҙың йәнле образдарын күҙ алдына килтереп баҫтыра: Иосиф Виссарионович Сталиндең һәм уның иң яҡын соратниктәренең рәсемдәрен күтәреп киләләр улар. «Иосиф Сталин» паровозы макетенең уң яғына яҙылған һүҙҙәр [illegible]

[illegible]

Ҡаланың иң ҙур заводтары коллективтары, һөнәрселек училищеларының уҡыусылары колонналары трибуна эргәһенән үтәләр. [illegible]

[illegible] үҙҙәренең 1950 йылғы нормаларын үтәүселәр ҙә, производствоға яңы рационализаторлыҡ тәҡдимдәре индереп социалистик хеҙмәттең яңы күтәрелеше өсөн көрәшеүсе алдынғы ижади фекер кешеләре лә бар. Завод-фабрикалар колонналарында ҡалабыҙҙың һәм республикабыҙҙың намыҫын һәм данын юғары тотоусы бик күп кешеләр бар. Уларҙың алдынғы сафында ҡыҙыл байраҡ күтәреп килеүсе кеше — ҡарт революционер Михайлов трибуна эргәһенә еткәс тә, урам бороломаһында ла үҙе менән бергә атлаусыларға әйләнеп-әйләнеп ҡарай, ғорурлыҡ менән йылмая һәм оркестр моңдарын баҫырлыҡ итеп, башҡаларҙы ла ылыҡтырып «ура» ҡысҡыра. Утыҙынсы йыл инде, һәр ваҡыт Беренсе Май көнөндә күкрәк кейереп, иркенләп атлап үтә ул ошо урамдарҙан. Һәр йыл һайын үҙендә яңы көс, яңы дәрт артҡанын тоя. Сөнки улар — бөйөк Ленин һүҙҙәрен иң тәүҙә киң массаларға таратыусы, Октябрь баррикадаларында большевиктарҙың нәге Сайрағын яҡлаусы ҡарт революционерҙар беҙҙең бөгөнгө тантанабыҙ, бөгөнгө бәхетебеҙ өсөн үҙҙәренең йәндәрен дә, ҡандарын да аямай көрәштеләр.

Ленин районы хеҙмәтсәндәренең колонналары «Шундай киң ул минең Тыуған илем» тигән йырҙы йырлап киләләр. Трибунаға яҡынлашҡас сафтарҙа йәнлелек тағы ла арта. Улар аҙымдарын аҡрынайталар һәм,

— Тыныслыҡ һәм демократия өсөн көрәшеүсе халыҡтарға сәләм! — тигән лозунгыны берҙәм рәүештә ҡабатлап, «ура» ҡысҡыралар. Трибуналағылар шундай уҡ берҙәмлек һәм күтәренке күңел менән уларҙың ауаздарына ҡушылалар. Агрегат заводы эшселәренең колоннаһы трибуна менән тигеҙләнгәс, бында торған кешеләр бер-береһенә ҡарап йылмаялар. — Завод эшселәре көлкө карикатура — яңы һуғыш уты тоҡандырырға маташыусыларҙың бер атаманы Черчиллдең ҡыҫҡа ҡанатлы тауыҡҡа оҡшатып төшөрөлгән карикатураһын тотоп киләләр. Бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең боевой көстәренә смотр көнөн — 1 Май тантанаһын үткәргәндә, халыҡтар коммунизм [illegible]

...«Апрель планы — 115 процентҡа үтәлде» — Телефон аппаратуралары заводы колоннаһы ҙур транспаранттағы ошондай яҙыу хеҙмәт күтәрелеше рапорты алып килә. Колонна алдында заводтың стахановсылары — Фохретдинова һәм Ибраһимова иптәштәр баралар. [illegible]

Киров районы хеҙмәтсәндәренең үтеүсе колонналарында ла — хеҙмәт алдынғылары — тау оборудованиелары заводының, «Башзолото» тресының данлы кешеләре киләләр. Сталинсә биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланып көрәшергә, бөйөк Сталиндең маҡтауына лайыҡлы булырлыҡ яңы хеҙмәт батырлыҡтары күрһәтергә әҙер тороуҙарын демонстрациялайҙар улар бөгөн.

Ныҡлы аҙымдар, ғәйрәтле һәм шат ауаздар ошо берҙәмлек һәм ихтыяр көсөн сағылдыра.

Ғ. Әхмәтшин.

1 Май, 1948 йыл.

ЯҢЫ ҠАЛАЛА ДЕМОНСТРАЦИЯ

1 Май көнө Черниковск ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең демонстрацияһы ҙур күтәренкелек менән үтте. Сәғәт иртәнге 9 тулғас та байрамса кейенгән, шат күңелле эшселәр, инженер-техник работниктәр һәм хеҙмәткәрҙәр берәмләп һәм төркөм-төркөм булып үҙҙәренең предприятиеларына табан ағылдылар.

Сәғәт ун тулғанда инде колонналар теҙелеп бөттөләр һәм ҡаланың үҙәк майҙанына табан ағылдылар. Беренсе булып машиналар төҙөү заводы коллективы үтә. Башта колонна менән етәкселек итеүсе ВКП(б) Үҙәк Комитетының парторгы иптәш Толмачев, уның артынан завод директоры, завком председателе һәм бөтә завод коллективы духовой оркестр көйөнә ғорур рәүештә баҫып үтәләр.

Бында Май алды социалистик ярышында хеҙмәттең гүзәл өлгөләрен күрһәтеп, апрель айы программаһын 156 процентҡа үтәгән, начальнигы иптәш Широков булған цех коллективына беренсе урын бирелгән. Юлбашсыларҙың портреттәре, төрлө төҫтәге лозунгылар араһында дүрт мөйөшлө ҙурлыҡса күгелйем таҡталар күренә. Уларҙың береһендә: «Беҙҙең стахановсыбыҙ Судаков март айынан бирле биш йыллыҡ нормаһын тыш продукция биреп килә», тип, икенсеһендә «Беҙҙең стахановсыларыбыҙ Кудрявцев, Четин, Ломтев, Суслин март айында уҡ биш йыллыҡ пландары үтәнеләр» тип яҙылған.

Икенсе колоннаның башында 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы коллективы ҙур ғорурлыҡ менән бара. Был коллектив ҡала предприятиелары араһында 6 айлыҡ нормаһын беренсе булып тамамланы.

Үҙәк майҙандан колонналар артынан-колонналар үтә. Партияның ҡала комитеты һәм ҡала Советы етәкселәре демонстранттарҙы байрам менән ҡотлайҙар. [illegible]

Бына нефть эшкәртеү заводы коллективы килә. Бында нефть эшкәртеү процестарын күрһәтеп торған макеттар бигерәк тә матур күренеп һәм был бизәлгән. [illegible]

Демонстранттар үҙәк майҙанды үтеп бөткәс, тәртипле рәүештә үйын-көлкө, йыр менән үҙ предприятиеларына табан юналделәр.

И. Ниғмәтуллин.

Ишембайҙа беренсе Май байрамы

1 Май ҡалала ҙур шатлыҡ көнө булып үтте. Урам һәм бинәләр ҡыҙыл байраҡтар һәм лозунгылар менән биҙәлгән. Һәр урында партия һәм хөкүмәт етәкселәренең портреттәре.

Ҡала хеҙмәтсәндәре 1 Майға ҙур производство еңеүҙәре менән килделәр. 146 цех, 321 бригада стахановсы вахтаға баҫып, производство планын арттырып үтәнеләр. Күп кенә предприятиелар байрамды пландан тыш продукция биреп ҡаршыланылар.

Иртә менән демонстранттарҙың колонналары стадионға ағылдылар. Уның ҙур майҙаны нефтселәр, машина төҙөүселәр, студенттар һәм уҡыусылар менән тулды. Бында 1 Майға арналған митинг булды.

Кис нефтселәр клубында үҙешмәкәрлек түңәрәгенең көсө менән ҙур концерт бирелде.

Ғ. Ибраһимов,
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Нефтселәр тантанаһы

ОКТЯБРЬСК. Ҡала байрамса биҙәлгән. Иртә таңдан уның урамдары һәм майҙандары шат йөҙлө, күтәренке күңелле кешеләр менән тулы ине.

Иртәнге 11 сәғәттә демонстранттарҙың колонналары стадионға йыйналды. Колоннаны «Туймазынефть» тресының алдынғы предприятиелары — 1-се номерле промысел, торлаҡ төҙөлөшө конторһы, төҙөлөш-монтаж конторһы коллективтары башлап бара. Улар 4 айлыҡ программаны арттырып үтәп, Май алды социалистик ярышында еңеп сыҡтылар.

Хеҙмәтсәндәр урамдарҙан ғорур баҫып үтәләр. ВКП(б)-ның ҡала комитеты секретары иптәш Сарычев уларҙы ҡотлап сығыш яһаны.

Демонстранттар партия һәм хөкүмәт етәкселәренең, бөйөк Ленин һәм Сталин портреттарын юғары күтәреп үтәләр. Плакаттарға Октябрьск нефтселәренең иптәш Сталинға ебәргән хатындағы «Нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда үтәйек, пландан тыш 50 мең тонна нефть бирәйек» тигән һүҙҙәре яҙылған.

Октябрьск ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең демонстрацияһы ике сәғәттән артыҡ ваҡытҡа һуҙылды. Уларҙа 5 меңдән артыҡ кеше ҡатнашты.

И. Болдогоев.

Хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде

Өфө ҡалаһындағы алебастр заводының директоры иптәш Якбухтин коллективтың Май алды социалистик ярышында өлгәшкән уңыштары тураһында түбәндәгеләрҙе хәбәр итте:

— Беҙ Май алды социалистик ярышҡа сығып, 5 айлыҡ планды 4 айҙа үтәү һәм эшләп сығарыуҙы күтәреү, продукцияның үҙенә төшөү хаҡтарын кәметеү йөкләмәләрен алғайныҡ. Коллектив алған йөкләмәһен үтәүҙә ныҡышмалы көрәш алып барҙы. Һөҙөмтәлә беҙ биш айлыҡ планды 16 апрелдә, срогынан 14 көнгә элек үтәнек. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 12 процентҡа кәметеүгә һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген 69 процентҡа күтәреүгә өлгәштек.

Был уңыштарға өлгәшеүҙә стахановсы Д. Мельник, С. Зәйнуллин, А. Әхьяров, С. Ғирфанов иптәштәр ныҡ тырышлыҡ күрһәттеләр. Улар үҙҙәренең эш нормаларын 200—330 процентҡа еткереп үтәнеләр.

АЛҒАН ЙӨКЛӘМӘЛӘРЕН ВАҠЫТЫНАН ЭЛЕК ҮТӘНЕЛӘР

Директоры иптәш Иткис булған завод коллективы Май алды ярышында ҡатнашып, Беренсе Май байрамын апрель айы планын 115 процентҡа үтәү менән [illegible] йөкләмәһен алғайны. Ул 26 апрелгә тулыһы менән үтәлде. Стахановсы Хәбибова, Фәхретдинова, Мөрәтова иптәштәр апрель айы планын 400—530 процентҡа еткереп үтәнеләр.

Икеләтә арттырылған темп

АУЫРҒАЗЫ. Райтоп коллективы (Директоры иптәш Вахитов) апрель айында икеләтә арттырылған темп менән эшләне. Һөҙөмтәлә айлыҡ производство планы 196,7 процентҡа, ағас материалдары әҙерләү планы 151,7 процентҡа үтәлде. Тәгәрмәс, сана табаны эшләү буйынса йылдың һуңғы айҙары иҫәбенә продукция етештерелә, ә тәгәрмәс тырнаҡтары эшләүҙең йыллыҡ планы 211 процентҡа үтәлде.

Коллективтың намыҫлы хеҙмәте БАССР Министрҙар Советы тарафынан 3500 һум бүләк биреләүе менән билдәләнде.

Ғ. Зәйнетдинов.

Өфөлә 1 Май демонстрацияһы ваҡытында автомашинала концерт биреп йөрөүсе йәштәрҙән бер төркөм. В. Жданов фотоһы.

Кесле хеҙмәт күтәрелеше

КАНДРА. (Телефон аша). СССР Верховный Советы Президиумының Указы тураһындағы хәбәр бик тиҙ арала басыуҙарҙағы бөтә трактор бригадаларына ла таралды.

— Был Указға колхоз басыуҙарында стахановсы эш менән яуап бирергә тейешбеҙ, — тине бригадир иптәш Мөхәмәтшин. [illegible] тракторҙа 1200-әр гектар ер эшкәртергә, [illegible] колхоҙҙа бәртекле ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 16-шар центнер урожай алыуға һүҙ бирҙеләр һәм шул көндө үк өлгөргән участкаларҙа һайлап һөрөү башланды. Бригада был көндө 5 гектарҙан артыҡ сәсеү күтәрҙе.

«Кандра» колхозы хеҙмәтсәндәре [illegible] Гәлиуллин һәм «Көрәш» колхозы хеҙмәтсәндәре Нәбиуллин [illegible] трактор бригадалары ла [illegible] социалистик ярыш [illegible] тракторсылар [illegible].

Кандра МТС-ы һәр комбайнеры [illegible] митингыла [illegible]

[illegible] менән үтте. Митингыла беренсе булып сығыш яһаусы алдынғы комбайнсы, СССР Верховный Советы депутаты иптәш Ғәйнетдинова Рәйфә партия һәм [illegible] Фархшин һәм Фәтхетдинова [illegible] Бөтә 18 комбайн моторы ремонтланды. Ремонтсылар 15 майға комбайндар ремонтлауҙы тулыһынса тамамларға һүҙ бирҙеләр.

Чапаев исемендәге колхоз [illegible] 24-әр центнер урожай алырға һүҙ бирҙе.

Г. Гәзизуллина.

Бөрө игенселәренең яуабы

БӨРӨ. (Телефон аша). «Березовый ключ» колхозы члендәре 1948—1949 йылдарҙа юғары урожай үҫтереүҙәре өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү һәм орденләр, медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указын радио аша тыңланылар һәм шунда уҡ фекер алышыуҙар башланды.

Баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле иптәш Г. В. Коломских һүҙ алып түбәндәгеләрҙе әйтте:

— Беҙҙең бригада быйыл үҙенә беркетелгән бөтә 141 гектар бөртөклө ашлыҡтың һәр гектарынан 23-әр центнер урожай алыуҙы бурыс итеп ҡуя. Йөкләмәне үтәү өсөн бригада члендәре бөтә көстәре менән тырышып эшләйҙәр.

— Беҙҙең артель, — тине колхоз председателе иптәш А. Н. Морозов, — быйыл 293 гектар майҙандың һәр гектарынан 18-әр центнер [illegible] йөкләмәне намыҫ менән үтәр. Колхозыбыҙҙа уҙған йыл юғары урожай үҫтереүҙәре өсөн 20 кеше хөкүмәт наградаһы алғайны, о быйыл уларҙың һаны тағы ла артыр.

СССР Верховный Советы Президиумының был яңы Указы «Урал», «Красный Октябрь», «20 лет «Правды», «12 лет Октября» колхоздарында ла, Базы һәм Бөрө МТС-тарында ла игенселәрҙе һәм механизаторҙарҙы быйыл тағы ла юғары урожай үҫтереү өсөн көрәшкә туплаһы. Хәҙер районда колхоз баҫыуҙарында өлгөргән ерҙәрҙе һайлап һөрөү эштәре башланды.

М. Гуревич.

РЕСПУБЛИКА БАСЫУҘАРЫНДА

Яңауыл районының алдынғы колхоздары быйыл ужым сәсеүҙе [illegible]

Чапаев, Ильич һәм Ворошилов исемендәге колхоздарҙа [illegible]

М. Фәтхов.

* * *

Бүздәк районында яҙғы баҫыу эштәрендә [illegible] «Красно-Тройск» колхозы [illegible] Беренсе көндә булып 15 гектар ужым тырматыуҙы [illegible]

«Кызыл» колхозында 15 гектар, «Колос» колхозында 5 гектар ер һөрелде.

Х. Сәттәров.

* * *

АУЫРҒАЗЫ. (Телефон аша). Районның колхоздары Беренсе Май байрамын [illegible]

«Свобода», Молотов исемендәге колхоздар [illegible]

Тракторсыларҙың стахановсыл эштәре

АҠЪЯР. Хәйбулла МТС-ының Фрунзе исемендәге, «Кен туған», «Рассвет», «Яңы юл» һәм «Новая жизнь» колхоздарына хеҙмәтләндереүсе [illegible] Бункин, Ғәлләмов, Корнилов, Кабаев һәм [illegible] 13—18 гектар ер һөрәләр.

СССР Верховный Советы Президиумының Указын [illegible] 600—700-әр гектар ер эшкәртергә [illegible]

Х. Латипов.

Хәйбулла МТС-ы директоры [illegible]

737 гектар үлән сәселде

ДӘҮЛӘКӘН. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районның колхоздарында яҙғы басыу эштәре [illegible]

Күп колхоздар костер үләне [illegible] «Новая жизнь» колхозы 150 гектар, «Парижская коммуна» колхозы 80 гектар, «Красная поляна», Ғафури һәм Салауат исемендәге колхоздар 40—50-шәр гектар майҙанда үлән сәсеү үткәрҙеләр.

Районда бөтәһе 737 гектар майҙанда костер сәселде.

СИТ ИЛДӘРҘӘ 1 МАЙҘЫ БАЙРАМ ИТЕҮ

Польша

Беренсе тапкыр Польша эшселәре Беренсе Май демонстрацияһын үткәреү өсөн дөйөм йыйналыу урындарына килделәр: ППР һәм ППС члендәре берҙәм колонналарҙа үттеләр.

5 меңдән артыҡ крәҫтиәндәр — крәҫтиән партияһы «Стронництво людове» һәм «Польске стронництво людове» члендәре Беренсе Майҙы байрам итеү өсөн тирә-яҡ яҡын ауылдарҙан башҡалаға йыйналдылар. Варшавала 200 меңдән артыҡ кеше демонстрацияла ҡатнашты. Польшаның башҡалаһында был тиклем халыҡты һыйҙыра алырлыҡ майҙан юҡ. Шуға күрә митингылар бер үк ваҡытта ике урында — театр һәм еңеү майҙандарында үткәрелде. Митингыларҙа ППС-тың генеральный секретаре премьер-министр Циранкевич, ППР-ҙың генеральный секретаре Гомулка һәм башҡалар телмәрҙәр һөйләнеләр.

Шулай уҡ Краков, Гдыня һәм башҡа ҡалаларҙа массовый Беренсе Май демонстрацияһы үткәрелде.

Чехословакия

Быйыл Чехословакияла 1 Майҙы байрам итеү ысын мәғәнәһендә бөтә халыҡ байрамына әйләнде. Прагаың 10-ар меңләгән хеҙмәтсәндәре транспаранттар, байраҡтар, сәскәләр менән Вацлав майҙанына йыйылдылар. Майҙанға килә торған бөтә урамдар демонстранттар менән тулды. Грандиоз Беренсе Май митингыһы үткәрелде.

Премьер-министр Готвальд үҙенең телмәрендә февраль көндәрендә демократия көсөнөң еңеүенән һуң, эске һәм бөтә донъя реакция көстәрен еңгәндән һуң Чехословакия халҡы ышаныслы милли берлектә шатлыҡ менән бөтә донъя хеҙмәтсәндәренең Беренсе Май көнөн байрам итеү [illegible] алды тип күрһәтте.

Митингыла Чехословакия халҡының тантаналы Беренсе Май анты иғлан ителде. 1 Май көнө Чехословакияның халыҡ берҙәмлегә, халыҡ демократияһы төҙөлешенә бирелгәнлек, бөтә донъяла демократияны һәм тыныслыҡты яҡлаусылар менән берҙәмлек һәм артабан да яңы социалистик тормош төҙөү юлы менән барыу лозунгылары аҫтында үткәрелде.

Франция

Быйыл Францияла 1 Майҙы байрам итеү айырым шарттарҙа үткәрелде. Хөкүмәт эшселәрҙең ниндәй генә шарттарҙа булыуға ҡарамаҫтан, Беренсе Май байрамын үткәреү теләгенә ҡаршы тора алмай, 1 Май көнөн эш хаҡтары түләнгән байрам көнө итеп иҫәпләргә мәжбүр булды. Хеҙмәт дөйөм конфедерацияһынан һәм коммунистар партияһынан тыш, «Форс Увриер» таратыусылары һәм генерал де Голль яҡлылар, шулай уҡ демонстрация үткәреү тураһында иғлан иттеләр. Де Голлселәр демонстрацияны ҡайҙалыр Париж ситендә, ә «Форс Увриер» Париждең бер кес кенә залында митинг үткәрҙе. Шул ваҡытта Париждең миллиондан артыҡ хеҙмәтсәндәре ВКТ һәм компартияның саҡырыуы буйынса берҙәмлек, тыныслыҡ өсөн, икмәк өсөн, азатлыҡ һәм милли бойондороҡһоҙлоҡ өсөн, француз эшселәр синыфының бөтә көндәлек талаптарын үтәү өсөн көрәш, тигән лозунгылар аҫтында көслө демонстрациялар ойоштороҙолар.

«Автономиялы профсоюздар» тип аталған ойошма метро йөрөтөүселәрҙе 1 Майҙа эш ташлауға өндәүҙәре менән демонстрацияны өҙөргә маташып ҡарағылар. Ләкин поездарҙы йөрөтөүсе — ВКТ члендәре — демонстранттарҙы йыйылыу урындарына алып барыуҙы тәьмин итеүҙәре арҡаһында, был провокация барып сыҡмаһы.

Колонналар уҙған ваҡытта күп меңләгән парижлылар уларҙы ҡайнар тәбрикләнеләр.

Бастилия майҙанында демонстранттарҙы Францияның компартия етәкселәре Морис Торез, Жак Дюкло, Марсель Кашен, ВКТ етәкселәре тәбрик иттеләр.

Италия

Римдә 100 мең хеҙмәтсән ҡатнашлығында байрам митингыһы булды.

ВЦСПС председателе В. В. Кузнецов көслө алҡыштар аҫтында митингыла ҡатнашыусыларҙы ҡотланы.

— Был көндә,—тине иптәш Кузнецов, хеҙмәт көстәре һәм тыныслыҡ көстәре, яңы һуғыш тоҡандырыусы көстәргә ҡарағанда, күберәктәр һәм көслөрәктәр тип белдерергә тейешбеҙ. Һуғыш тоҡандырыусылар эшенә ҡомасаулау өсөн беҙ хеҙмәтсәндәрҙең халыҡ-ара берҙәмлеген һаҡлап ҡалыу һәм нығытыу кәрәклеген тәрән рәүештә аңларға тейешбеҙ.

Совет халҡы, совет профсоюздары һәр ваҡыт был берҙәмлек яҡлы булдылар һәм шулай булып ҡалалар. Һәм улар был принципкә тоғролоҡтарын һаҡлаясаҡтар һәм бөтә донъя профсоюздар федерацияһы эсендә быны өсөн көрәшәсәктәр.

Рим хеҙмәтсәндәре Беренсе Майҙы профсоюз берҙәмлегә, социал реформалар, тыныслыҡты, хеҙмәтте һәм азатлыҡты тәьмин итеү лозунгылары аҫтында билдәләнеләр.

АҠШ

Нью-Йоркта Беренсе Май демонстрацияһында күп меңләгән эшселәр һәм прогрессив фекерҙәге граждандар ҡатнашты. Демонстранттарҙың лозунгылары демократик фекерҙәге бөтә америкалыларҙы «беҙҙең илебеҙҙе милитаризациялауға һәм беҙҙе фашистик юл буйынса алып барыуға йүнәлтелгән пландарҙы өҙөргә» саҡырҙылар.

Демонстранттар: «Тыныслыҡ өсөн көрәштә берләшергә», «Һуғыш тоҡандырыусыларҙың эшен һис кисекмәҫтән туҡтатырға», «Маршалл планы» фашистар өсөн винтовкалар тигән һүҙ», «Тыныслыҡ өсөн көрәштә Советтар Союзы менән хеҙмәттәшлек өсөн» тигән һәм башҡа шундай лозунгылар күтәреп йөрөнөләр.

Демонстрацияла ҡатнашыусылар һуғыш эшенә өйрәтеүгә һәм мәжбүри хәрби хеҙмәткә ҡаршы, антикоммунистик закон проектына ҡаршы, тыныслыҡты саҡлап итеп, хеҙмәт хаҡын күтәреү тураһында эшселәрҙең талаптары яҡлап резолюциялар ҡабул иттеләр.

Англия

Лейбористар хөкүмәтенең политик демонстрацияларҙы тыйыуына ҡарамаҫтан, Лондондың күп кенә төньяҡ һәм көнсығыш өлөштәрендә 50 меңгә яҡын эшсе компартияның һәм Лондон профсоюздары советының саҡырыуына яуап бирҙеләр һәм ҡаланың баш урамдары буйынса Гайд-паркка табан марш менән үттеләр.

Демонстранттар һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы һәм Бевиндың тышҡы политикаһына ҡаршы, тыныслыҡ өсөн көрәшкә саҡырыусы һәм бөтә фашистик ойошмаларҙы тыйыуҙы, эшселәрҙең хеҙмәт хаҡын күтәреүҙе һәм бәләләрҙе түбәнәйтеүҙе талап итеүсе плакаттар күтәреп йөрөттөләр.

Англия компартияһы Беренсе Май манифесын иғлан итте. Унда: АҠШ-та һәм Англияла һуғыш тоҡандырыусы енәйәтсе хеҙмәттәр тыныслыҡҡа яңы, тағы ла көслөрәк һуғыш менән янаһыусы [illegible], тип әйтелә. Европаға фашистарға һәм реакционерҙарға ярҙам күрһәтелә һәм әбәй халыҡтың зыяны яһала. 1948 йылдың 1 Майы тыныслыҡты һаҡлау өсөн һәм уларҙың йәшәү кималеш яҡлау өсөн булған бөйөк хәрәкәттә бөтә хеҙмәтсәндәрҙе берләштерергә тейеш.

Югославия

Югославия халыҡтары халыҡ-ара хеҙмәт көнөн айырыуса күтәренке кәйеф менән байрам иттеләр. Белградтағы үҙәк майҙанында хәрби парад булды. Шунан һуң майҙанға демонстранттар колонналары килде.

Фабрикаларҙың һәм заводтарҙың матур итеп биҙәлгән һәм хәрәкәт итеүсе макеттәре, Югославия промышленносенең һәм ауыл хужалығының производство продукциялары, транспаранттар, лозунгылар Югославия халҡының экономик һәм политик тормошоноң төрлө өлкәләрендә өлгәшелгән уңыштарын күҙаллайҙар.

Демонстранттар Советтар Союзы һәм халыҡ демократияһы илдәре хеҙмәтсәндәрен ҡотлаусы һәм бөтә донъяла тыныслыҡты нығытырға саҡырыусы лозунгылар күтәреп йөрөнөләр.

Кисен Белградта халыҡ гулянкелары булды.

Шулай уҡ Загребта, Любляна һәм халыҡ республикаларының башҡа башҡалаларында һәм Югославияның промышленность үҙәктәрендә хеҙмәтсәндәрҙең демонстрациялары булды.

Италияла сенатҡа һайлауҙар буйынса һуңғы мәғлүмәттәр

РИМ, 28 апрель. (ТАСС). Бынан кә суд инстанциялары илдең 20 өлкәһендә сенатҡа һайлауҙар буйынса бирелгән тауыштарҙы иҫәпләп бөттөләр.

Сенаттағы 237 урын түбәндәгеләрсә бүленде: халыҡ демократик фронты—72 урын, (35 коммунист, 31 социалист, 6 бойондороҡһоҙ партия члены), христиан демократик партия—130, сарагатсылар—11, «милли блок»—10, республикан партия—5, монархистар—[illegible], «Көньяҡ Тиролдең халыҡ партияһы»—3, «Сардинияның хәрәкәт итеү партияһы»—1, «Италия социалистик хәрәкәте»—1.

Ил алдындағы хеҙмәттәре өсөн «хоҡуҡ буйынса» сенатҡа билдәләнгән сенаторҙар һаны—10[illegible]. Сөнки ҡарт парламентарийҙарҙы берсһе либерал Рччи һайлауҙар осоронда үлде. Билдәләнгән сенаторҙар араһында 31 коммунист, 11 социалист, «хеҙмәт демократияһы» партияһы члены—[illegible], «Сардинияның хәрәкәт итеү партияһы» члены—2, христиан демократтары—18, сарагатсылар—[illegible], республикансылар—5, либералдар—5, Куалюнкуистар—2 һәм бойондороҡһоҙ партиянан—17 кеше. «Хоҡуҡ буйынса» билдәләнгән сенаторҙар араһында халыҡ фронты яҡлы кешеләр һаны [illegible] самаһы. Сенат группаларының аныҡ персональ составы сессия асылғандан һуң билдәле буласаҡ.

ТӨҘӘТЕҮ

Газетабыҙҙың 1 май номерендә икенсе биттә, «Металлургтарҙың бүләктәре» тигән хәбәрҙең поселке тираждың бер өлөшөндә хата киткән. Шуны түбәндәгесә төҙәтеп уҡырға «Партияның Белорет ҡала комитеты секретаренең промышленность буйынса урынбаҫары».

Редакция.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Павел Ухов

Цехтың был группаһында станоктар шаулаған тауыш ишетелмәй. Станоктар тирәһе лә бында төгәү машинаһынан бөтөнләй түгел, һәр станок өҫтөндә ҡалай абажурҙар эсенә йәшерелгән электрик лампочкалары көндөҙ ҙә янып торалар. Тышҡы ҡарағанда бында эшләүселәр бер ҙә ҡабаланмайҙар һымаҡ. Сәғәт төҙәтеүсе мастерҙар һымаҡ, эшләгән деталдәрен әллә-ниҙә ҡарап үлсәйҙәр, [illegible], һыныҙалар, тағы ла ҡарайҙар. Үлсәйҙәр, тағы ла һөртәләр.

Уларҙы заводта лекальщиктар, тип йөрөтәләр.

Цехтың иң түптәге мөйөшөндә бәләкәй генә аҡ бер өҫтәл тора. Уның өҫтө йомшаҡ фланель материал менән ҡапланған. Өҫтәл өҫтөндә хирургия инструменттарын хәтерләтеп ялтырап торған инструменттар һәм микрометр ята. Ҡаршы яҡта бәләкәй генә станок. Станокта оптик прибор. Эшсе кәрәкле булған лекалде станокта эшкәртә, ә үҙе оптик прибор аша ҡарап алыҫ араға ла мәргән атҡан снайпер төҫлө, эшенең теүәллеген приборҙан күҙәтеп тора.

Тап-таҙа итеп ҡырылған, сәстәрен ыҫпай итеп артҡа тараған, күлдәк йәшле, тереләк йөҙ кеше беҙҙе ымлап, беҙгә ҡулын бирҙе.

— Ухов Павел Александрович,—тине ул күңелле итеп.

Ухов оҫта ҡатмарлы лекальщиктар группаһының бригадиры. Ул заводта слесарь-лекальщик булып иҫәпләнә. Ләкин был дөрөҫ түгел. Ҡул һа[illegible] машинаның торған ҡатмарлы лекалдәр эшләп сығарыу өсөн слесарь булыу ғына ла, механик булыу ғына ла етмәй. Бында тыра белеү генә лә, шымарта белеү генә лә етмәй. Бында артист булырға, художник булырға кәрәк. Бында һәр ваҡыт ижад итергә һәм тойорға кәрәк. Эйе, эйе, бында эшләүсе ла ысын мәғәнәһе менән художник тойғоһо булырға тейеш. Сөнки ҡатмарлы лекалдәр эшләп сығарыу эше бер ниндәй ҙә тулаһы менән механикалаштырырға мөмкин түгел. Лекал ул — төрлө-төрлө, күп ваҡыт бик ҡатмарлы һәм ғәрәттән тыш теүәллек талап ителә торған деталдәрҙе эшләгәндә уларҙың теүәллеген билдәләү өсөн ҡулланыла торған өлгө—шаблон үлсәү. Бындағы лекалдәрҙә миллиметрҙың меңдән бер өлөшө тиклем дә теүәлһеҙлек булыуы мөмкин түгел. Ҡатмарлы техника шуны талап итә.

Павел Ухов йомшаҡ йылмайыуында дауам иткән килеш һөйләй.

— Был эште ысын күңелдән яратырға кәрәк. Шулай булмағанда, бер эш тә сыҡмаясаҡ...

Мин иркһеҙҙән Алексей Максимович Горькийҙың талант ул, ул элек хеҙмәткә булған мөхәббәт тигән һүҙҙәрен хәтерләйем.

Эйе, үҙ эшенә булған мөхәббәт ул — һине еңеүгә алып килә торған ҡанат.

* * *

Бынан ун ике йыл элек булды был ҡал. Ленинградтағы оптик-механик заводы эргәһендәге ФЗУ мәктәбен тамамлаусыларға һуңғы һынауҙар бара ине.

Бөтә зал тантаналы тымлыҡта ултырғанда күңелә тулыуҙан тауышы үҙгәреп, ҡарашын киткән ҡарт мастер, кәмәш төҫлө йылтырап торған, түра мөйөшлә бәләкәй генә лекалде юғары күтәреп,

— Иң яҡшы башҡарылған эш! Иҫәп теүәллек. Бына, эшкә булған ҙур мөхәббәт һөҙөмтәһе. Киләсәктә лә шундай нығынлыҡ, тырышлыҡ һәм һәйбәт эшләү теләйем һиңә, Павел, — тине.

Павел ысындан да ғәжәп түҙемле һәм иң киткес тырыш егет булды. Ҡайһы ваҡыт шулай лекалде кәрәк булған дәүмәлдә эшләп бөттөм тигәндә генә ниндәй ҙә булһа бер көтөлмәгән ҡулдың артыҡ бер хәрәкәте арҡаһында деталь бер генә миллиметрға артыҡ шымартылып ташлана һәм сәғәттәр буйына барған көсәрҡәнешле хеҙмәт юҡҡа сыға. Бөтәһен ҡайтадан башларға һәм шул уҡ ваҡытта һис тулҡынланмай һәм ҡабаланмай ҙур иғтибар менән эшләргә кәрәк. Бында етерлек түҙемлелектең булмаһа тотонорға ла ярамай. Ә ул түҙемлелек булыр өсөн алға ҡуйған маҡсатҡа тура барырға һәм үҙ эшендә ысын күңелдән яратырға кәрәк ине.

Павел әле ләүкә саҡта атаһынан йәтим ҡалды. Александр Иванович Ухов Бөйөк Октябрь революцияһының инициаторы булған данлы Питер эшселәренән ине. Тыуған илен, коммунистар партияһын бөтә йөрәге менән һөйә торғайны. Шуға күрә уны халыҡ дошмандары күрә алмаһылар. 1922 йылда Петербургтағы хеҙмәт-холоҡ төҙәтеү йорттарының береһендә комиссар булып эшләгәндә ауырып больницаға ингәс, уны атыулап үлтерҙеләр. Павел тормошта үҙ юлын үҙе бындаларға һәм бөтәһенән дә элек үҙе тырышырға тейеш булды. Дөрөҫ, уны государство үҫтерҙе, партия һәм комсомол Питер эшселәренә дәстүрен итеп тәрбиәләнеләр. Шуға ҡарамаҫтан, иң элек үҙенә тырышырға кәрәклектә Павел бик тиҙ төшөндө. Эшендә йәки тормошонда ҡыйынлыҡтар килеп тыуғанда, ул атаһын хәтерләй ине.

— Минең атайым кеүек тоғро, уның кеүек тырыш булырға тейешмен. Уховтар тотонона, коммунистар тотонона тап төшөрөргә тейеш түгелмен,—тип уйлай ине.

Бынан алты йыл элек Павел Ухов Черниковск машиналар төҙөү заводына күсеп килде. Иҫкә алып тораһы ла юҡ, ауыр булды ул көндәр. Үҙгәртеп, ҙурайтып төҙөү эше барған был заводта торор урын да, эш урыны ла тейешенсә ойошторолмаған була торғайны. Ләкин Павел был ҡыйынлыҡтарға сыҙаны. Ул һаман үҙ эшен камиллаштырыуын һәм тырышып эшләүен дауам итте. Ил-алдына килеп баҫҡан ҙур һынау Павелде тағы ла серьезыраҡҡа әйләндерҙе. Ул ашау-эсеү һәм таулекка бер нисә сәғәт кенә йоҡлап алыуҙан ҡалған бөтә ваҡытын заводта үткәрә башланы.

Йылдар үтте. Завод үҫте. Завод менән бергә Павел Ухов та үҫте.

Был урта буйлы, һәр ваҡыт йылмайып һөйләшә торған егетте кистәрен заводтың парткабинетында һәм техник библиотекала күрергә була ине. Ул үҙ профессияһы — слесарлек менән генә сикләнмәй. Ҡатмарлы лекалдәр яһай торған лекальщик өсөн бер нисә күрше специальностарҙе белеү ҙә бик мөһим. Павел Александрович быны бик тиҙ төшөнә. Шуға күрә ул шлефовальщик специальносына ла эйә була, сарлау эшенә лә өйрәнә. Был хәл һәм дөйөм техник белемле булыу уға һәр ваҡыт алмашынып тора торған лекалдарҙе нисек тиҙерәк һәм уңышлыраҡ итеп эшләү юлын табырға мөмкинлек бирә. Шул арҡала Ухов эш ваҡытының бер генә секундын да бушҡа үткәрмәүгә өлгөшә ала.

Павел үҙенең биш йыллыҡ планын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының утыҙ йыллығына тамамланы.

— Миң айлыҡ заданиемде 400 процентка үтәргә һүҙ бирәм, — тине, Павел Александрович Башҡортостан партия ойошмаһының өлкә конференцияһы трибунаһынан. — ә биш йыллыҡтың аҙағына ул ике йыллыҡ планды үтәргә йөкләмә алам.

Һәм шунда уҡ ул үҙ заводына, үҙ эшенә булған сикһеҙ мөхәббәтен бик ябай һүҙҙәр менән әйтте.

— Заводтың үҙ заданиеларен үтәүҙә артта ҡалыуын ишетеү минең күңелемә ауыр. Минең йөрәгем ҡыҫыла.

Был, коммунистың, ысын патриоттың һүҙҙәре ине. Ул үҙенең һәм үҙ бригадаһының планды арттырып үтәүе менән генә ҡәнәғәтләнмәй. Уны бөтә заводтың, бөтә илдең еңеүен тәьмин итеү теләге борсой.

Павел Ухов производство алдынғыһы булып ҡына түгел, партия члены булараҡ та бик ҙур эштәр алып бара. Павел цехта агитатор. Перерыв ваҡыттарында, эш башланыр алдынан ул эшселәр менән төрлө политик темаларға беседалар үткәрә, докладтар яһай. Улар бергәләп тә берҙәм художестволы китаптар уҡырға яраталар.

Павел Александрович цех партбюроһының, ВКП(б) ҡала комитетының һәм Өлкә Комитетының члены.

Партия эшенә, Ватан эшенә бирелгәнлек һәм уларға булған ҙур мөхәббәт Павел Уховҡа бөтә ауырлыҡтарҙы ла еңеп сығырлыҡ көс бирә. Ул еңеүҙәрҙән еңеүҙәргә ҡарай бара.

Әкрәм Вәли.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы. 25 Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-[illegible] промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2-72-26

П01727. Өфө газета-журналдар типографияһы. А. — 2. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башкорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 89

5 май шаршамбы

хаҡы 20 тин

„Матбуғат көн һайын ғына түгел, ә сәғәт һайын үҫергә тейеш,— ул беҙҙең партиябыҙҙың иң үткер һәм иң көслө ҡоралы“

(И. В. СТАЛИН).

Большевистик матбуғат көнө

Бөгөн 5 май — большевистик матбуғат көнө. Бынан 36 йыл элек, 1912 йылдың 5 майында, Петербургта, Ленин күрһәтеүе буйынса, иптәш Сталин инициативаһы менән ойошторолған «Правда» газетаһының беренсе номеры сыҡты.

Большевистик матбуғат помещик-буржуаз иҙеүен юк итеү өсөн, совет төҙөлөшө өсөн, социализм өсөн, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында иң яуыз дошманды еңеү өсөн көрәштә халҡыбыҙҙың көрәш юлын коммунистәр партияһының бөйөк идеялары менән яктырта килде, хеҙмәтсәндәрҙе партиябыҙҙың данлы байрағы тирәһенә тупланы, уларҙы һәр ваҡыт яңы еңеүҙәргә рухландырҙы. Хәҙер беҙҙең матбуғатыбыҙ илебеҙҙә коммунизм еңеүе өсөн көрәштә коллектив пропагандист, агитатор һәм ойоштороусы булып тора.

Ленин һәм Сталин яңы типтағы матбуғатты, бары тик халҡка ғына, халҡтың интересторенә генә хеҙмәт итә торған матбуғатты барлыҡҡа килтерҙеләр. Бындай матбуғат, ысын азат, ысын халҡ матбуғаты беҙҙә генә, социализм еңгән илдә генә йәшәй һәм сәскә ата. Капиталистик төҙөлөштә, эксплоатация йәшәгән ерҙә азат матбуғат юҡ һәм уның булыуы ла мөмкин түгел.

Совет матбуғаты киң хеҙмәтсәндәр массаһы араһында ҙур авторитет менән файҙалана. Совет кешеләре беҙҙең матбуғатты уның принципиаллеге өсөн, Тыуған илгә, халкка бирелгәнлеге өсөн, яңы һуғышка әҙерләнеүсе бөтә реакционерҙәрҙе аяуһыҙ фаш итеүе, прогресс, демократия һәм тыныслыҡ өсөн арымай-талмай көрәш алып барғаны өсөн ярата, ихлас күрә.

Ленин—Сталин милли политикаһын эҙмә-эҙ рәүештә тормошка үткәреү арҡаһында беҙҙә формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культура сәскә атты. Элек үлеп бөтөүгә хөкөм ителгән милләттәр Бөйөк Октябрь социалистик революцияһынан һуң бөйөк рус халҡының ярҙамында үҙҙәренең милли әҙәбиәттәрен, газеталарын, журналдарын булдырҙылар. Башҡортостанды ғына алайыҡ. Республикабыҙҙа өс өлкә газета, йөҙҙән артыҡ ҡала, район, фабрика-завод газеталары сығарыла. Уларҙың дөйөм тиражы йөҙҙәрсә мең нөсхәләп. Китап баҫыу сағыштырғыһыҙ үҫте. Марксизм-ленинизм классиктәренең — Маркс, Энгельс, Ленин, Сталиндың бөйөк хеҙмәттәре башҡортсаға тәржемә ителделәр. Иптәш Сталиндың биографияһы башҡорт телендә баҫылып сыҡты. Башҡорт халҡының илдә тормошонда ҙур бер ваҡиға булып тора.

Рус художество әҙәбиәте классиктәренең А. Пушкин, Лермонтов, Гоголь, Некрасов, Л. Толстой, Чехов, Горькийҙың иң күренекле әҫәрҙәренең тәржемәләре башҡорт әҙәбиәтен байыталар. Совет матбуғаты иң ҙур һәм яуаплы бурыстар алдында тора. Беҙҙең матбуғат үҙенең бөтә көсөн иң мөһим бурысты үтәүгә — һуғыштан һуңғы тезләтеү һәм артабан үҫтереү, биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә, киң массаларҙы коммунизм рухында тәрбиәләүгә йүнәлдерергә тейеш. Хәҙер биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярыш тулҡыны илебеҙҙә көндән-көн киңәйә бара. Беҙҙең матбуғат был ярыштың алдынғыларын тулыраҡ күрһәтергә, уларҙың эш тәжрибәләрен һәр яҡлап популярлаштырырға, артта ҡалыусыларҙы ҡыйыуыраҡ тәнҡитләргә тейеш. Хеҙмәтсәндәрҙең социалистик аңлылығы ни тиклем юғары булған һайын коммунизм өсөн көрәштә беҙҙең уңыштарыбыҙ ҙа шул тиклем күберәк буласаҡ.

Һуғыштан һуң ауыл хужалығын күтәреү өлкәһендә матбуғаттың роле тағы ла ҙур. Беҙгә ауыл хужалығын ҡыҙыу темптар менән күтәрергә кәрәк. Республикабыҙ ВКП(б) Үҙәк Комитете февраль Пленумының «Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһындағы» тарихи ҡарарын үтәү өсөн көрәштә үҙған йыл ҙур ғына уңыштарға ирешә. Был көрәштең иң алдынғыларынан 12 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Күптәре ордендәр һәм медалдәр менән наградланды. Бына был ауыл хужалығы алдынғыларының бай тәжрибәһен мөмкин тиклем киңерәк популярлаштырыу, ауылда социалистик ярышты йәйелдереү һәм хәҙер, республика баҫыуҙарында эш йәйелә барған саҡта, сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғары агротехника нигеҙендә үтәү өсөн большевистик көрәш — матбуғаттың иң һуғышсан бурысы булып тора.

Беҙҙең матбуғатыбыҙҙың көсө массалар менән тығыҙ бәйләнештә булыуында. Беҙҙең газеталарыбыҙҙа һәм журналдарыбыҙҙа промышленностең һәм ауыл хужалығының алдынғылары — инженерҙар һәм стахановсылар, колхозсылар һәм ауыл хужалығы специалистәре, фән һәм әҙәбиәт работниктәре ҡатнашалар, үҙҙәренең тәжрибәләре менән уртаклашалар. Газеталар актив менән, хәбәрселәр менән эшләүҙе тағы ла көсәйтергә тейештәр. Совет газетаһы массалар менән даими рәүештә һәм тығыҙ бәйләнештә булғанда ғына, хәбәрселәр менән өҙлөкһөҙ эш алып барғанда ғына үҙенең коллектив пропагандист, агитатор һәм ойоштороусы ролен үтәй алаҫаҡ.

Беҙҙең республика тормошонда район газеталары ҙур көс булып торалар. Ләкин асыҡ әйтергә кәрәк, күп кенә район газеталарының идея-политик һәм культура кимәле түбән, уларҙың тематикаһы тар, актив һәм хәбәрселәр менән бәйләнеше йомшаҡ, шуға күрә улар район тормошон бик зәғиф сағылдыралар, оператив түгелдәр, иң мөһим, әммә иң актуаль мәсьәләләрҙе күтәрмәйҙәр. ВКП(б)-ның район комитеттәре районда политик, хужалыҡ һәм культура тормошонда ҙур ойоштороусы ролдәрен үтәүсе район газеталарына ярҙамды көсәйтергә, уларҙа ла масалар араһында политик эш алып барыуҙа ярҙам итергә тейештәр. Был бөтәһенән элек район газеталарына етәкселекте яҡшыртыуҙы талап итә.

Партия идеологик мәсьәләләрҙе бөгөнгө көн бурыстары юғарылығына күтәреүҙе талап иткән саҡта газетаның, журналдың һәм һәр бер китаптың политик-идея һәм культура кимәлен тағы ла күтәреү өсөн большевиктарса көрәшеү барлыҡ матбуғат работниктәренең дә иң мөһим бурысы булып тора.

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

ЧЕЛӘБЕ ӨЛКӘҺЕ МЕНӘН БАШҠОРТ АССР-ы КОЛХОЗСЫЛАРЫ, КОЛХОЗСЫ ҠАТЫН-ҠЫҘҘАРЫ, МТС ҺӘМ СОВХОЗ РАБОТНИКТӘРЕ, АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ СПЕЦИАЛИСТӘРЕ АРАҺЫНДА СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШ ОЙОШТОРОУ ТУРАҺЫНДА

ВКП(б)-ның Челәбе Өлкә Комитете һәм өлкә исполкомы 1948 йылда ауыл хужалығын күтәреү буйынса Башҡорт АССР-ы һәм Челәбе өлкәһе колхозсылары, МТС, совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең социалистик ярышын ойоштороу тураһындағы тәҡдим менән Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советына һәм ВКП(б) Өлкә Комитетына мөрәжәғәт иттеләр.

Тәҡдим ҡабул ителде. БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты ВКП(б) райкомдарын һәм район Советы исполкомдарын һәр бер колхозда, МТС һәм совхозда Башҡорт АССР-ы һәм Челәбе өлкәһе колхозсыларының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының, МТС, совхоз работниктәренең һәм ауыл хужалығы специалистәренең 1948 йылда ауыл хужалығын күтәреү буйынса алған йөкләмәләрен аңлатыуҙы ойошторорға мәжбүр иттеләр.

В. И. ЛЕНИН, И. В. СТАЛИН һәм В. М. МОЛОТОВ 1917 йылда «Правда» редакцияһында.
Художник П. Васильев һүрәте.

Республикабыҙҙа большевистик матбуғат

Октябрь революцияһы, Ленин—Сталин партияһы башҡорт халҡына Автономия бирҙе. Был азатлыҡ автономияһын алыу менән башҡорт халҡы яҙма тел һәм әҙәби телде булдырыу эшенә башланы һәм бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә яҙма һәм әҙәби тел барлыҡҡа килде.

Хәҙерге көндә республикала 58.700 данала өс өлкә газета — «Кыҙыл Башҡортостан», «Ҡыҙыл таң», «Красная Башкирия» газеталары сыға. 2115 данала «Октябрь» журналы, башҡорт, татар, рус телдәрендә «Агитатор блокноты», республиканың төрлө райондарында бер нисә телдә 101 район газетаһы сыға.

Октябрь революцияһынан һуң барлыҡҡа килгән Башгосиздат Башҡортостанды әҙәби китаптар, дәреслектәр һәм марксизм-ленинизм әҙәбиәте менән байытыуҙа ҙур урын алып тора. 1922 йылдан алып 1946 йылға тиклем Башгосиздат башҡорт, рус, татар телдәрендә биш мең исемдә 30 миллион тиражда брошюра, китаптар, дәреслектәр, Ленин һәм Сталин әҫәрҙәрен баҫып сығарҙы.

ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ҺАҠЛЫҠ АҠСАЛАРЫБЫҘҘЫ ГОСУДАРСТВОҒА БУРЫСҠА БИРЕП, ТЫУҒАН ИЛЕБЕҘҘЕҢ ҠЕҮӘТЕН ТАҒЫ ЛА НЫҒЫТАЙЫҠ!

Ҙур күтәренкелек менән

Халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһындағы хөкүмәттең радио аша хәбәр итеүен ишеткәс тә Башҡорт государство педагогия институтының профессор-преподавателдәре, студенттәре институт залына йыйылдылар. Митингыла студенттәр, уҡытыусылар, профессорҙар сығыш яһанылар. Уларҙың ҡыҫҡаса телмәрендә яңы заемды хуплау, Тыуған илде тағы ла ҡеүәтле, көслө итеү, артабан сәскә аттырыу теләге ине.

— Яңы заемдың әһәмиәте әйтеп бөтергеһеҙ, — тине марксизм-ленинизм нигеҙҙәре уҡытыусыһы иптәш Ғөбәйҙуллин, — государствоға биргән һәр бер һумыбыҙ тормошобоҙҙоҡ тағы ла яҡшырыуына, Тыуған илебеҙҙең артабан нығыуына ярҙам итәсәк. Мин үҙем бер айлыҡ эш хаҡына яҙылам һәм башҡаларҙы ла быға саҡырам.

Коллективтең теләге бер ине. 30 минут ваҡыт эсендә Башпединституттың профессор-преподавателдәре, студенттәре һәм техник работниктәре барлығы 212 мең 750 һум заемға яҙылып та өлгерҙеләр. Улар араһында профессор Романов 6 мең һумға, тарих фәндәре кандидаты Мәжитов 5 мең һумға, уҡытыусы Смирнов 4.700 һумға яҙылды. Заемға яҙылыу ҙур күтәренкелек менән үтте.

Н. Нәжметдинов.

Тормош матурыраҡ, күңеллерәк булһын

СССР Министрҙәр Советының халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы сығарыу тураһындағы ҡарары радио аша тапшырыла башлағас та, Бәләбәй ҡалаһы промышленность предприятиеләрендә, учреждениеләрҙә һәм райондың колхоздарында күп халҡ ҡатнашлығында митингылар башланды.

Машиналар төҙөү заводында митинг ҙур политик күтәренкелек менән үтте. Беренсе булып стахановсы слесарь иптәш Журбенко сығыш яһаны.

— Яңы государство заемы Тыуған илебеҙҙе тағы ла байыраҡ һәм ҡеүәтлерәк итергә ярҙам итәсәк. Мин тормош тағы ла матурыраҡ һәм күңеллерәк булһын өсөн айлыҡ хеҙмәт хаҡымдан 500 һумға артығыраҡ яҙылам, — тине ул һәм 1.300 һумға подписка биреп, шунда уҡ 300 һумын аҡсалата индерҙе.

Контролер иптәш Козодаев заемға алты аҙналыҡ хеҙмәт хаҡына яҙылды.

10 минут эсендә завод коллективе 100 проценте менән яңы заемға яҙылыуҙы тамамланы.

Ҡаланың башҡа предприятиеләрендә һәм учреждениеләрендә подписка нигеҙҙә тамамланды.

Башҡортостанда заемға яҙылыу ойошҡан рәүештә бара

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһындағы ҡарарҙы ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар. Яңы заем сығарылыу тураһында радио аша хәбәр алыныу менән республиканың предприятиеләрендә, учреждениеләрендә, колхоздарында митингылар үтте һәм шунда уҡ заемға яҙылыу башланды.

Республика буйынса заемға яҙылыу, 55 райондан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 3 майҙа 24 сәғәткә 116.383 мең һум тәшкил итте. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, ауыл ерҙәрендә заемға яҙылыу иҫәбенә 4.495 мең һум аҡса индерелде.

Башҡалала подписка суммаһы 34.728 мең һумға етте, йәки эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең айлыҡ эш хаҡының 82,6 процентен тәшкил итә.

Стәрлетамаҡ ҡалаһында 4 майҙа иртәнге 10 сәғәткә подписка буйынса бюджет суммаһы үтәлде. Йәғни был ҡалала заемға яҙылыу 7. 610 мең һумға етте.

Саҡмағош районы колхозсылары 950 мең һумлыҡ заемға яҙылдылар һәм 350 мең һумын аҡсалата индерҙеләр.

Яңауыл районы ауылдарында яңы заем 893 мең һумға урынлаштырылды һәм 820 мең һумы шунда аҡсалата индерелде.

Яңы заемға яҙылыу буйынса Баймаҡ районы алдынғы сафта бара. Был райондың ауылдарында бер нисә сәғәттә бюджет суммаһы тулыһынса үтәлде. 382 мең һум аҡсалата индерелде, был подписка суммаһының 80 процентен тәшкил итә.

Заемға яҙылыу дауам итә.

Я. Бәҙретдинов,
Башҡортостан хеҙмәт һаҡлыҡ кассаһы һәм Госкредитеның оператив бүлеге мөдире.

Бер күңелдән

СССР хөкүмәтенең халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы сығарыу тураһында ҡарарын радио аша ишетеү менән, «Башнефть» берекмәһе эшсе һәм хеҙмәткәрҙәренең, инженер һәм техник работниктәренең күп кеше ҡатнашлығында митингтары булып үтте. Бөтә кеше шат күңелле. Улар үҙҙәренең бөтә халҡ эшендә ҡатнашыуҙарын, үҙҙәренең средстволары менән һөйөклө государствобыҙға ярҙам күрһәтеүҙәрен уйлап хаҡлы рәүештә ғорурланалар.

Беренсе һүҙҙе партбюро секретаре иптәш Калашников ала.

— Яңы заем, — ти ул, — халҡ хужалығын артабан үҫтереүгә, халҡтың культура һәм көн-күреш шарттарын тағы ла яҡшыртыуға, совет государствоһының ҡеүәтен нығытыуға ярҙам итәсәк. Беҙ государство заемына беренсе тапҡыр ғына яҙылмайбыҙ. Илебеҙҙе индустриалаштырыу, коллектив хужалыҡ төҙөү осоронда беҙ, сит илдәрҙән ярҙам алмайынса, үҙ средстволарыбыҙ менән хөкүмәтебеҙгә ярҙам иттек. Ватан һуғышы йылдарында хәрби заемға яҙылып, немец-фашист илбаҫарҙарын һәм япон империалистәрен ҡыйратыу сәғәтен тиҙләттек. 1948 йыл сталинсе яңы биш йыллыҡ планды үтәүҙә хәл иткес йыл булып тора. Сөнки совет кешеләре халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереүҙең грандиоз программаһын 4 йылда үтәргә ҡарар итте. Ә был бик күп аҡса биреүҙе талап итә. Государство заемына яҙылып, беҙ биш йыллыҡ пландың дүрт йыл эсендә үтәлеүенә ныҡлы нигеҙ һалырбыҙ.

Трибунала Социалистик Хеҙмәт Геройы «Башнефть» берекмәһенең өлкән геологы иптәш Трофимук.

— Яңы заемға берҙәм рәүештә, бер күңелдән яҙылып, үҙебеҙҙең көсөбеҙҙе, совет хөкүмәте, большевиктәр партияһы һәм һөйөклө атайыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә тағы ла тығыҙыраҡ тупланыуыбыҙҙы бөтә донъяға күрһәтәйек, — тип саҡыра иптәш Трофимук. — Мин яңы заемға хеҙмәт хаҡымдың 150 проценте күләмендә — 4.500 һумға яҙылам.

Митингыла ҡатнашыусылар үҙҙәренең ҡарарҙарында халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһында хөкүмәт ҡарарын бер күңелдән хупланылар.

Митингынан һуң яңы заемға яҙылыу башланып, бер сәғәт эсендә 72.495 һумлыҡ подписка йыйналды. Был — совет кешеләренең Тыуған илгә йән-тән менән бирелеүҙәренең, уның хаҡына теләгән ҡорбанды бирергә әҙер тороуҙарының асыҡ күрһәтелеше булып тора.

Заемға яҙылыу уңышлы үтә

Белорет металлургия комбинатында яңы государство заемына яҙылыу ойошҡан рәүештә, ҙур политик һәм производство күтәрелеше обстановкаһында бара. Металлургтар бер айлыҡ һәм унан да артығыраҡ хеҙмәт хаҡына подписка бирҙеләр.

Ширпотреб цехы коллективе бер сәғәттә заемға яҙылыуҙы тамамлап, айлыҡ хеҙмәт хаҡының 102,4 проценте күләмендә подписка бирҙе.

Медиктәр заемға яҙыла

Башҡорт медицина институты коллективе араһында яңы заем таратыу ҙур политик күтәрелеш менән башланды. Медицина институтында 2 мең кеше ҡатнашлығында митинг булып үтте.

Митингыла студенттәр һәм профессорҙар исеменән профессор Чурбанов беренсе булып һүҙ алды. Ул үҙенең сығышында:

— Совет халҡы немец илбаҫарҙары тарафынан емертелгән хужалыҡты үҙ көсө менән аяҡҡа баҫтыра, — тине, — һәм беҙҙең государствоға бурысҡа бирелгән аҡсаларыбыҙ заводтар, фабрикалар төҙөргә һәм ауыл хужалығын күтәреүгә китә. Мин ысын күңелдән 7 мең һумға заемға яҙылам.

Профессор Шерестянников иптәш Чурбановтың сығышын хупланы. Һәм Ватаныбыҙҙың даны өсөн мин 8 мең һумға яҙылам тине.

Студенттәрҙән Батталов үҙ сығышында бөтә студенттәрҙе бер айлыҡ стипендия күләмендә заемға яҙылырға саҡырҙы. Митингынан һуң профессор Татаринов 8 мең һумға, профессор Кузнец 7.200 һумға, профессор Спасский 7.500 һумға, профессор Сомцов 7 мең һумға, доценттәр Московиҷ һәм Сөләймәнов иптәштәр, 6-шар мең һумға яҙылып, берәр мең һумын аҡсалата индерҙеләр.

Тыуған илебеҙҙең артабан сәскә атыуы өсөн

Яңы заем сығарыу тураһында хөкүмәт ҡарары радио аша тапшырылғас та Черниковскиҙағе 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһында күп халҡ ҡатнашлығында митинг булып үтте.

Эшселәр араһынан клейщица иптәш Боброва беренсе һүҙҙе алып:—Минең эш хаҡым айға уртаса 530 һумға тура килә. Мин яңы заемға ҙур теләк менән 600 һумға яҙылам, — тине.

— Хөкүмәт тарафынан сығарылған яңы заем, — тине цех начальнигы иптәш Лопухова,—халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға, илебеҙҙең экономикаһын тағы ла нығытыуға йүнәлтелгән, беҙҙең илебеҙҙең экономикаһы ни тиклем ныҡ булһа, халҡыбыҙҙың тормошо ла шул тиклем яҡшырыр, бөйөк юлбашсыбыҙ Сталиндең аҡыллы етәкселегендә йәшәһен, сәскә атһын Тыуған илебеҙ.

Көслө алҡыштар аҫтында иптәш Лопухова 1.400 һумға (айлыҡ эш хаҡы 880 һум) яҙылды.

Митинг ябылғас та, ҡыҙыу рәүештә заемға яҙылыу башланды, һәр кем алдыныраҡ булып яҙылырға ашыҡты. Иптәш Боброваның өлгөһөндә стахановсы клейщицалар һәм лучильщиктәрҙән Кириллова, Зоболотова, Андреева, Лунева һәм башҡалар ай ярымлыҡ эш хаҡына, монтер Михеев 1000 һумға яҙылдылар.

Биш йыллыктың өсөнсө хәл иткес йылы заемы

СССР Финанс Министре А. Н. КОСЫГИН

Совет Хөкүмәте тарафынан СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы сығарылды.

Бөйөк Ватан һуғышы тамамланғандан һуң һәр береһе 20-шәр миллиард һумлыҡ суммаға сығарылған элекке ике заем бер нисә көн эсендә таратылғайны: беренсеһе 1946 йылда 22 миллиард һумға, ә икенсеһе 1947 йылда 22,9 миллиард һумға, йәғни билдәләнгән суммадан байтаҡ артыҡ итеп таратылғайнылар.

Беҙҙең заемдарыбыҙҙың уңышы совет кешеләренең юғары патриотик аңлылығының, уларҙың социалистик ватанға фиҙакәр рәүештә бирелгәнлегенең һәм үҙҙәренең хөкүмәте тирәһенә, Ленин — Сталин партияһы тирәһенә туплан ғанлыҡтарының күрһәткесе булып тора.

Беҙҙең заемдарыбыҙ халыҡ араһында йыл һайын ҙурыраҡ популярлыҡ яулап алалар: заемға яҙылыусылар һаны йыл һайын үҫә бара, һәм улар 65 миллион кешенән дә артты лар инде.

Совет заемдарының уңышы һәм популярлығы шуның менән бергә беҙҙең государствобыҙ интересҭарының хеҙмәтсәндәрҙең киң массалары интерестары менән бер икәнлеген характерлай. Заем, СССР-ҙың көсәтле хужалыҡ күтәрелешенә һәм культураһының сәскә атыуына ярҙам итеп, шулай уҡ государство заемына яҙылыусы кешеләргә өҫтәмә рәүештә материаль файҙалар (отоштар) бирә. Был отоштарҙың әһәмиәте хәҙер карточка системаһы бөтөрөлгәндән һуң, совет һумы нығығанда, уның һатып алыу һәләтлеге үҫкәндә һәм хаҡтар түбәнәйгәндә бигерәк тә ныҡ үҫте. Беҙҙең заемыбыҙ был шарттарҙа облигация тотоусыларға доход килтереүсе, халыҡтың аҡса һаҡлығы туплауының ышаныслы юлы булып тора.

Яңы заем һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты үтәү өсөн халыҡтың средстволарын артабан ылыҡтырыуға иҫәп тотоп сығарылды. Совет халҡы үҙенең государствоһына бурысҡа биреп торасаҡ средстволар беҙҙең илебеҙ алдына иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған төп бурысты: — яҡын ваҡытта халыҡ хужалығы үҫешенең һуғышҡа тиклемге кимәленән байтаҡ уҙыу, халыҡтың материаль яҡтан яҡшы көн-күрешен күтәреүгә һәм Совет государствоһының хәрби-экономик ҡеүәтен тағы ла күберәк нығытыу бурысын үтәүгә ярҙам итәсәктәр.

1946 йыл — яңы биш йыллыҡтың беренсе йылы — халыҡ хужалығының төп тармаҡтарын һуғыштан һуң ҡайтанан ҡороу, уларҙы тыныс хужалыҡ төҙөлешенә күсереү йылы булды.

1947 йылда, хужалыҡ үҫешенең темптарын сәрьез тиҙләтеү айҡанлы, 1940 йылғы промышленностең валовой продукцияһының уртаса квартал кимәленә өлгәшелде.

Үҙған йыл темптарҙың өҙлекһеҙ үҫә барыуы менән билдәләнде. 1947 йылда промышленность продукцияһын эшләп сығарыу, 1946 йылдың ошо уҡ осорҙары менән сағыштырғанда, кварталдан кварталға үҫә бара: беренсе кварталда — 12 процентҡа, икенсе кварталда — 18 процентҡа, өсөнсө кварталда — 26 процентҡа, дүртенсе кварталда — 30 процентҡа үҫте. Ҡара һәм төҫлө металдар, күмер, электр энергияһы, төҙөлөш һәм ағас материалдары, химик продукттар производствоһының байтаҡ үҫеүен айырыуса билдәләп үтергә кәрәк. 1947 йылда еңел һәм текстиль промышленносе продукциялары 33 процентҡа, йәғни 1946 йыл менән сағыштырғанда, өстән бер өлөшкә артты. Шәкәр етештереү ике тапҡырҙан артығыраҡҡа, балыҡ тотоу—28 процентҡа, үҫемлек майы эшләп сығарыу —24 процентҡа һәм һабын эшләү — 28 процентҡа артты.

1947 йылда бер үк ваҡытта эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәт хаҡы фонды, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 23 процентҡа артты.

1947 йылда өлгәшелгән уңыштар һөҙөмтәһендә тауар әйләнеше байтаҡ артты. Халыҡ государство һәм кооператив сауҙаһында, 1945 йылғыға ҡарағанда, бер ярым тапҡырға артығыраҡ, һәм 1946 йылғыға ҡарағанда, 17 процентҡа артығыраҡ ҡулланыу тауарҙарын алды.

Ауыл хужалығында, ВКП(б) Үҙәк Комитетының Февраль Пленумы ҡарарҙарын уңышлы үтәү нигеҙендә, 1947 йылда валовой продукцияның ҙур үҫешенә өлгәшелде. Үҙ араларында йөҙәрләгән данлы эшсәндәр Социалистик Хеҙмәт Геройҙары тигән почетлы исемде алған беҙҙең колхоз крәҫтиәндәре мул урожай үҫтереп йыйнап алдылар. Ауыл хужалығының валовой продукцияһы 1947 йылда тотош алғанда 32 процентҡа, ә баҫыусылыҡтың валовой продукцияһы — 48 процентҡа артты. Бер үк ваҡытта бөртөклө ашлыҡ культураларын етештереү бер йыл эсендә 58 процентҡа, мамыҡ—21 процентҡа, картуф — 30 процентҡа, шәкәр сөгөлдөрө—190 процентҡа, көнбағыш — 79 процентҡа артты.

1948 йыл биш йыллыҡтың хәл иткес йылы булып тора. Советтар Союзы хеҙмәтсәндәре хәҙер һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда тормошҡа ашырыу өсөн героик көрәш алып баралар. 1948 йылда промышленность производствоһының һуғыштан һуңғы кимәленән уҙып китәсәкбеҙ, капиталь эштәр күләме байтаҡ үҫәсәк, халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарының көсәтле күтәрелешенә өлгәшеләсәк, ә бының менән беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәренең төрлө ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн киң ҡулланыу тауарҙарын эшләп сығарыуҙың байтаҡ үҫешенә өлгәшеләсәк.

Ошо йылдың беренсе кварталы байтаҡ уңыштар менән билдәләнде. Промышленность тарафынан квартал планы тотош алғанда 102 процентҡа үтәлде. Промышленностең валовой продукцияһы ағымдағы йылдың беренсе кварталында, үҙған йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда, 32 процентҡа үҫте.

Оккупацияға дусар ителгән райондар промышленностең ҙур уңыштарын айырыуса билдәләп үтергә кәрәк. Был райондарҙа 1948 йылдың I кварталында промышленностең валовой продукцияһы, 1947 йылдың I кварталы менән сағыштырғанда, 59 процентҡа артты.

Халыҡ хужалығындағы эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең һаны, 1947 йылдың I кварталына ҡарағанда, 2 миллион кешегә артты. Промышленноста эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге 21 процентҡа үҫте.

Бөтә халыҡ хужалығының алдынғы көсө булып тороусы ауыр индустрия тарафынан беренсе кварталда яулап алынған ҙур уңыштарҙы билдәләү айырыуса әһәмиәтле булып тора. Киң ҡулланыу тауарҙарын һәм аҙыҡ-түлек продукттарын эшләп сығарыу байтаҡ артты.

Ауыл хужалығы ла өҙлекһеҙ рәүештә үҫә бара. 1948 йылдың I кварталында яҙғы сәсеү эштәренә әҙерлек, үҙған йылғыға ҡарағанда, юғарыраҡ кимәлдә үткәрелде, машина-трактор станцияларында һәм совхоздарҙа тракторҙарға көҙгө-ҡышҡы ремонт үткәреү планы үтәлде, колхоздар һәм совхоздар тулыһынса орлоҡтар менән тәьмин ителделәр һәм алдынғы техника менән яҡшыраҡ ҡоралландырылды. Яҙғы сәсеү тағы ла ойошҡаныраҡ һәм юғары агротехник кимәлдә үтә.

I кварталдың йомғаҡтары беҙҙең илебеҙҙең хеҙмәтсәндәрен 1948 йыл планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн тағы ла фиҙакәрерәк хеҙмәткә дәртләндерәләр.

Биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылының халыҡ хужалығы планы ошо йылдың башында СССР Верховный Совете Сессияһы тарафынан ҡабул ителгән Государство бюджеты цифрҙарында үҙенең гәүҙәләнешен тапты. Бюджет доходтар буйынса 429 миллиард һум суммаһында һәм расходтар буйынса 388 миллиард һум суммаһында раҫланды. Доходтар расходтарға ҡарағанда 41 миллиард һумға артығыраҡ.

Бюджеттең расход өлөшөнөң 40 проценты тип әйтерлек — 149 миллиард һумы халыҡ хужалығын финансировать итеүгә, йәғни 1947 йылғыға ҡарағанда, 16,3 миллиард һумға артығыраҡ итеп күҙҙә тотола. Бер үк ваҡытта промышленносҡа булған расходтар 93,9 миллиард һум — үҙған йылғыға ҡарағанда 10 миллиард һумға артығыраҡ, ауыл хужалығына булған расходтар — 20 миллиард һум йәғни үҙған йылғыға ҡарағанда, 3,2 миллиард һумға артығыраҡ тәшкил итәләр.

Быйыл бары тик капиталь төҙөлөшкә генә лә государство бюджетынан 61 миллиард һум аҡса расходланасаҡ.

Быйыл социаль-культура сараларына ассигнованиелар шулай уҡ байтаҡ үҫәләр: улар 116,5 миллиард һум, йәғни үҙған йылғыға ҡарағанда, 10 миллиард һумға артығыраҡ сумма тәшкил итәләр. Был сумманың яртыһына яҡын өлөшө—60,5 миллиард һумы мәғариф эшенә китәсәк расходтар. Был сумма үҙған йылғы расходтарҙан 9 миллиард һумға артығыраҡ һәм мәғариф эшенә бүленгән һуғышҡа тиклемге расходтарҙан байтаҡ юғары. Социаль-культура саралары араһында һаулыҡ һаҡлау мөһим урын алып тора, уға 1948 йылда 20,9 миллиард һум расходланасаҡ. Быйыл дауалау учреждениеларенең, бала тыуҙырыу йорттары һәм балалар учреждениеларының селтәрен байтаҡ киңәйтеү күҙҙә тотола. 1948 йылда социаль тәьминәт эшенә йәғни башлыса хеҙмәт һәм һуғыш инвалидтарына пенсиялар түләүгә, шулай уҡ күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә пособиелар түләүгә тағы ла ҙурыраҡ сумма—22,6 миллиард һум бүленә.

Беҙҙең бюджетыбыҙ ҙур финанс программаһын үтәү өсөн кәрәк булған средстволарҙы башлыса социалистик хужалыҡтан — промышленностан, транспорттан, ауыл хужалығынан, сауҙанан ала. Был доходтар производствоның өҙлекһеҙ үҫеүенә, тауар әйләнешенең артыуына, продукцияның үҙенә төшөү хаҡының һәм айырым расходтарының кәмеүенә, төҙөлеш хаҡының кәмеүенә һәм халыҡ хужалығында булған резервтарҙы мобилизациялауға нигеҙләнгән.

Бюджеттең доход өлөшөндә государство заемдары буйынса халыҡтан инә торған аҡсалар ҙа күренекле урын тоталар. Был 1948 йылға 20 миллиард һум суммаһында билдәләнгән. Әгәр ҙә был һанды капиталь һалымдар суммаһы менән сағыштырып ҡарағанда, халыҡ хужалығындағы бөтә капиталь төҙөлештең өстән бер өлөшө государство заемдары бирә торған средстволар менән тәьмин ителә ала.

Яңы заем илебеҙҙә аҡса реформаһы үткәрелгәндән һуң һәм халыҡты карточкалар буйынса тәьмин итеүҙән — берҙәм, түбәнәйтелгән государство хаҡтары буйынса асыҡ совет сауҙаһына күскәс сығарыла.

Был һуғыштан һуңғы күсеү осорондағы иң мөһим экономик саралар аҡса һәм тауар әйләнеше өлкәһендә һуғыш эҙемтәләрен бөтөрҙөләр.

Аҙыҡ-түлеккә һәм промышленность тауарҙарына ваҡлап һатыу государство хаҡтарын түбәнәйтеү, шулай уҡ кооператив сауҙаһында һәм колхоз баҙарында хаҡтарҙың кәмеүе һөҙөмтәһендә ошо йылдың беренсе кварталында совет һумының һатып алыу һәләтлеге 41 процентҡа күтәрелде. Эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡы, һумдың һатып алыу һәләтлеге күтәрелеүе һәм аҡсалата хеҙмәт хаҡының үҫеүе һөҙөмтәһендә, 1947 йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда, уртаса 51 процентҡа күтәрелде.

Иптәш Сталин 1946 йылдың башында уҡ әле, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың бурыстары тураһында әйтеп, «...киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе киңәйтеүгә, бөтә тауарҙарға хаҡтарҙы түбәнәйтә барыу юлы менән хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреүгә айырыуса иғтибар ителәсәк» тип күрһәткәйне.

Хаҡтарҙы түбәнәйтеүҙең беренсе этабы 1947 йылдың декабрендә аҡса реформаһы үткәргән саҡта тормошҡа ашырылды. СССР Министрҙар Советы күптән түгел генә хаҡтарҙы түбәнәйтеүҙең икенсе этабын тормошҡа ашырҙы: 1948 йылдың 10 апреленән күп кенә тауарҙарға ваҡлап һатыу государство хаҡтары яңынан 10 проценттан алып 20 процентҡа тиклем күләмдә түбәнәйтелде.

Хаҡтарҙы эҙмә-эҙле рәүештә түбәнәйтә барыу һөҙөмтәһендә эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең реаль хеҙмәт хаҡтары кимәле һәм крәҫтиәндәрҙең доход кимәлдәре өҙлекһеҙ рәүештә күтәрелә, был беҙҙең государство заемдары өсөн база булып торған халыҡ һаҡлыҡтарының үҫеүенә һәм йыйылыуына яҡшы шарттар тыуҙыра.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы 20 миллиард һум суммаһында 20 йыл срок менән сығарылды. Заемдан килгән бөтә доход отоштар рәүешендә түләнә, уларҙың дөйөм суммаһы 20 йыл эсендә уртаса йылына 4 процент тәшкил итә.

Һәр йылды, 1949 йылдан башлап, отоштарҙың икешәр тиражы үткәрелә.

Заем суммаһы 20 миллиард һум булғанда заемдың 20 йыллыҡ срогында дөйөм 17.811.200 мең һум суммалыҡ 66 миллион отош уйналасаҡ.

Отмаған облигациялар уларҙың үҙ хаҡтары менән 1953 йылдың 1 октябренән башлап 15 йыл эсендә түләнә (кире һатып алына).

Шулай итеп, государство заемдың хаҡы 20 миллиард һум суммаһында булғанда заем облигациялары тотоусыларға 31 миллиард һумдан артыҡ аҡса түләй.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын таратыу—ул ҙур массовый-политик кампания.

Заем кампанияһын үткәреүҙә партия, комсомол, профсоюз ойошмалары, хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтары, финанс органдары һәм һаҡлыҡ кассалары ойоштороусы роль уйнарға тейештәр. Шулай уҡ госкредитҡа һәм һаҡлыҡ эштәренә ярҙам итеү комиссияһы мөһим практик роль уйнарға бурыслы. Улар туранан-тура предприятиеларҙа, учреждениеларҙа һәм колхоздарҙа заемға подписка үткәрәләр.

Заем таратыу көндәрендә бөтә ҡала һәм ауыл халҡы араһында киң аңлатыу эше алып барылырға тейеш. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн бөтә халыҡ хәрәкәте шарттарында яңы заемдың әһәмиәтен һәр бер хеҙмәтсән кешегә аңлатырға, заемды сығарыу шарттары тураһында һәм ул подписчиктарға килтерә торған файҙалар тураһында һөйләргә кәрәк.

Заем таратыуҙы яҡшы ойоштороу заемға яҙылыуҙа бөтә ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренең ҡатнашыуын тәьмин итергә тейеш.

Үҙған йылдарҙағы кеүек үк, заем таратыу «Өс-дүрт аҙналыҡ эш хаҡын государствоға бурысҡа» лозунгыһы аҫтында ҡәтғи рәүештә иркле үткәрелә. Был лозунгынан сығып бөтә хеҙмәтсәндәрҙе заемға яҙылырға һәм Тыуған ил алдында үҙҙәренең патриотик бурыстарын яҡшы аңлағанлыҡтарын күрһәтергә саҡырырға кәрәк.

Заемға яҙылыусы үҙе алған облигацияларҙың хаҡын шунда уҡ аҡса индереп, йәки 10 ай эсендә түләй ала. Заемға 10 ай эсендә түләү шартында яҙылған ваҡытта эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм кооперация һөнәрселәре подписка буйынса взностарҙы үҙҙәренең эш хаҡтарынан үҙҙәренең предприятиеларының һәм учреждениеларының бухгалтерияһы аша түләйҙәр. Беренсе взнос 1948 йылдың май айының беренсе яртыһы өсөн эш хаҡынан һәм һуңғы взнос 1949 йыл февраль айының икенсе яртыһы өсөн эш хаҡынан түләнә. Колхозсылар заем хаҡын ауыл Советтары уполномоченныйҙары аша түләйҙәр.

Заемды ауылда таратҡан ваҡытта аҡсалата түләүҙе ойоштороуға айырыуса иғтибар бирелергә тейеш. Крәҫтиәндәргә, заемға яҙылыусы бөтә кешеләргә булған кеүек үк, улар алған облигацияларҙың хаҡын түләү өсөн 10 ай срок бирелә. Ләкин, үҙған йылдарҙың тәжрибәһе күрһәткәненсә, крәҫтиәндәр облигациялар хаҡын, заемға яҙылғанда уҡ йәки яҡындағы ҡыҫҡа срок эсендә түләйҙәр. Совет крәҫтиәндәренең экономикаһы заемға яҙылыу буйынса расчеттарҙың ошондай тәртибенә тулыһынса ярҙам итә. Шуға күрә ауылда заем таратыуҙы ойоштороусыларҙың бурысы заем хаҡын срогынан алда түләүҙә колхозсыларҙың ағымдағы йылда, үҙған йылдарға ҡарағанда, тағы ла ҙурыраҡ инициатива күрһәтеүҙәрен тәьмин итеүҙән тора.

Ауыл активистәре һәм беренсе нәүбәттә колхоз председателдәре, правление члендәре һәм колхоз бригадирҙары, ауыл Советтарының депутаттары һәм заем буйынса уполномоченныйҙар үҙҙәренең заемға яҙылыуҙары һәм уны срогынан алда түләүҙәре менән бөтә крәҫтиәндәр массаһы өсөн өлгө булып торорға тейештәр.

Бурыс — заемға яҙылыуҙы уңышлы рәүештә үткәреүҙән генә түгел, бәлки бюджетҡа заем средстволарының үҙ ваҡытында инеүен тәьмин итеүҙән дә тора. Бының өсөн, предприятие йәки учреждение бухгалтерияһының эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә хеҙмәт хаҡы биргән һайын подписка буйынса нәүбәттәге взностарҙы тулыһынса тотоп ҡалыуы һәм был суммаларҙы үҙ ваҡытында государство бюджетына бирә барыу өҫтәнән күҙәтергә кәрәк. Крәҫтиәндәрҙән заемға яҙылған ваҡытта йыйналған аҡсаларҙы уполномоченныйҙар шул көндә үк налог агентына тапшырырға тейештәр.

Заемды уңышлы рәүештә таратыу — был киң массовый аңлатыу эшен үткәреү нигеҙендә заемға яҙылыусылар сафына бөтә хеҙмәтсәндәрҙе ылыҡтырыу, ҡыҫҡа сроктар эсендә заемға яҙылыуҙың юғары һөҙөмтәләрен тәьмин итеү, заемға яҙылыу һөҙөмтәләрен нығытыу һәм үҙ ваҡытында бюджетҡа заем средстволарының инеүенә өлгәшеү тигән һүҙ.

Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылында беҙҙең илебеҙ алдында бик ҙур һәм ҡатмарлы бурыстар тора. Беҙҙең бөтә героик халҡыбыҙ был бурыстарҙы уңышлы рәүештә хәл итә. СССР хеҙмәтсәндәре бөйөк хеҙмәт һәм патриотик күтәренкелек менән беҙҙең Тыуған илебеҙҙең ҡеүәтен артабан нығытыу буйынса сталинсе пландарҙы үтәйҙәр һәм арттырып үтәйҙәр.

Совет иле эшселәренең, крәҫтиәндәренең һәм интеллигенцияһының яңы заемды бер тауыштан күтәреп алыуҙарында һәм берҙәм рәүештә яҙылып, Совет Хөкүмәтенә, Ленин — Сталин партияһына үҙҙәренең фиҙакәр бирелгәнлектәрен тағы ла бер тапҡыр демонстрациялауҙарында шик юҡ.

СССР менән Пакистан араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыуға ҡарата

Ошо йылдың 13 апрелендә Пакистан сит ил эштәре министре сэр Зафрулла Хан үҙ Хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса СССР Сит ил Эштәре Министренең хәҙерге ваҡытта Нью-Йоркта тороусы урынбаҫары А. А. Громыкоға Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Пакистан араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында тәҡдим яһап мөрәжәғәт итте.

СССР Хөкүмәте Пакистан Хөкүмәтенең ошо тәҡдименә риза икәнлеген белдерҙе.

1948 йылдың 1 майында СССР һәм Пакистан араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында сэр Зафрулла Хан һәм А. Громыко нотала алыштылар.

Пакистан сит ил эштәре министре Зафрулла Хан әфәндегенең СССР Сит ил Эштәре Министре иптәш В. М. Молотов исеменә яҙған нотаның тексы түбәндәгесә:

Ғали йәнәптәр!

Минең Хөкүмәтем, минең Хөкүмәтем һәм СССР Хөкүмәте өсөн үҙ-ара интересҭа булған күп кенә мәсьәләләрҙе иғтибарға алып, әгәр ҙә ике хөкүмәт араһында посолдар рангыһында дипломатик вәкиллек алышыу үткәрелһә, ике ил өсөн дә файҙалы булыр ине, тигән ҡарашта тора. Шуға күрә минең Хөкүмәтемдең бындай алышыуҙы үткәрергә теләүе тураһында Һеҙҙең Хөкүмәтегеҙгә белдереү Хөкүмәтемә әйәмен һәм, Һеҙҙең Хөкүмәтегеҙ посолдар алышырға шундай уҡ теләк менән яуап бирер, тип ышанам.

Ғали йәнәптәр, үҙемдең Һеҙгә тәрән хөрмәт итеүемә ышандырып, Һеҙҙең тыңсыл хеҙмәтсегеҙ булыу Хөрмәтенә әйәмен.

Сэр Зафрулла Хан, Пакистан сит ил эштәре министры».

СССР Сит ил Эштәре Министренең Урынбаҫары А. А. Громыко ошо нотаға яуап итеп, Зафрулла Хан әфәндегә түбәндәге йөкмәткеләге нотаны тапшырҙы:

«Ғали йәнәптәр,

Һеҙҙең 1948 йыл 27 апрелдә яҙылған һәм унда Һеҙ үҙ Хөкүмәтегеҙ исеменән Совет Социалистик Республикалар Союзы менән Пакистан араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырырға һәм посолдар рангыһында дипломатик вәкилдәр алышырға теләп белдергән нотағыҙға яуап итеп, Һеҙгә, СССР Хөкүмәте Пакистан Хөкүмәтенең был тәҡдимен ҡабул итә һәм уның менән ошо күрһәтелгән рангыла дипломатик вәкилдәр алышырға әҙер, тип белдереү хөрмәтенә әйәмен.

Ғали йәнәптәр, минең Һеҙгә булған тәрән хөрмәтемде ҡабул итегеҙ.

А. Громыко, Сит ил Эштәре Министренең Урынбаҫары». (ТАСС).

Колумбия хөкүмәтенә Совет Хөкүмәтенең протесе

14 апрелдә совет матбуғатында хәбәр ителгәненсә, СССР-ҙың Колумбиялағы миссияһы менән СССР Сит ил Эштәре Министерствоһы араһындағы бәйләнеш өҙөлгәйне. Бары тик 21 апрелдә генә, бәйләнеш өҙөлгәндән һуң беренсе тапҡыр булараҡ, СССР-ҙың Колумбиялағы эштәрҙә поверенныйынан информация килде. Был информацияла Богота ҡалаһында (Колумбияның башҡалаһы) совет миссияһы сотрудниктәре торған йортҡа ҡоралды һөжүм яһалыуы тураһында белдерелде.

Был айҡанлы СССР-ҙың Колумбиялағы эштәрҙә поверенныйы Е. Н. Феликка Колумбия сит ил эштәре министре Сулет әфәндегә түбәндәге белдереүҙе ебәрергә ҡушылды:

12 апрелдә кис СССР-ҙың Колумбиялағы миссияһының 2-се секретаре һәм башҡа сотрудниктәре йәшәй торған йортҡа ҡоралды һөжүм яһалды, миссия сотрудниктәре тентелделәр, уларҙың документтәре, аҡсалары һәм шәхси милектәре һөжүмдә ҡатнашыусы кешеләр тарафынан алып кителгән. Был асыу тыуҙырыусы факт тураһында Совет хөкүмәтенә бары тик 10 көндән һуң ғына билдәле булды, йәғни совет миссияһы менән СССР Сит ил Эштәре Министерствоһы араһындағы бәйләнеш 10 апрелдән башлап 21 апрелгә тиклем Колумбия яғы тарафынан өҙөлгәйне.

Колумбияның башҡалаһы Боготала совет дипломатик вәкилдәренә ҡарата юғарыла күрһәтеп үтелгән енәйәтсел акттың имеш «совет агенттәре» йәки «рус агенттәре» Колумбияла күптән түгел булып үткән ваҡиғаларҙа ҡатнашлыҡ иттеләр, тигән башынан алып аҙағына тиклем ялған булған һәм асыҡтан-асыҡ провокацион хәбәрҙе таратырға ярҙам итеүсе Колумбия властереның туранан-тура юл ҡуйыуында Советтар Союзына дошмандарса юғәнһеҙ кампания эҙемтәһе булып тороуында бер ниндәй ҙә шик юҡ.

Совет хөкүмәте СССР-ҙың Боготалағы миссияһын Мәскәү менән бәйләнештән мәхрүм итеүгә һәм совет дипломатик вәкилдәренең шәхси милектәренә туранан-тура ҡул һуҙыуға ҡаршы Колумбия хөкүмәтенә протест белдерә. Совет хөкүмәт миссияһы сотрудниктәренең йортона һөжүм яһау ваҡытындағы обстоятельстволарҙы тикшереүҙе, миссия сотрудниктәренең уларҙан тартып алып кителгән документтәрен һәм ҡиммәтле нәмәләрен һәм милектәрен кире ҡайтарып биреүҙе, һәм ошо енәйәтсел эштәрҙә ғәйепле кешеләрҙе ҡаты яуаплылыҡҡа тарттырыуҙы ныҡышмалы рәүештә талап итә. (ТАСС).

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Башҡорт АССР-ы территорияһында „Урман аҙнаһы“ үткәреү тураһында

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, һыу һаҡлау урмандарын аяҡҡа баҫтырыу, дым һаҡлаусы урман полосалары булдырыу, ҡалаларҙы, район үҙәктәрен, эшселәр поселкаларын һәм халыҡ йәшәүсе башҡа пункттарҙы йәшелләндереү, бушлыҡ ерҙәргә ағастар ултыртыу һәм яр буйҙарын нығытыу, еләк-емеш баҡсалары булдырыу маҡсатында бөтә общественность көсө менән 1948 йылдың 5 майынан алып 12 майға тиклем Башҡортостан территорияһында «Урман аҙнаһы» үткәреүгә ҡарар итте.

«Урман аҙнаһында» совет, партия комсомол, профсоюз ойошмаларының, институт, техникум һәм мәктәп уҡыусыларының, колхозсылар һәм урындағы бөтә граждандарҙың көстәре менән ҡалаларҙа, район үҙәктәрендә, эшселәр поселкаларында, колхоздарҙа, совхоздарҙа һәм МТС-тарҙа, мәктәп, больница һәм индивидуаль йорт усадьбаларында декоратив, емеш-еләк ағастары һәм ҡыуаҡтар ултыртырға; бушлыҡтарҙы, соҡор һәм яр буйҙарын, ҡомлоҡтарҙы йәшелләндерергә, дым һаҡлаусы урман полосалары булдырырға, шулай уҡ ҡалаларҙа һәм халыҡ йәшәй торған башҡа пункттарҙа урман дачаларын һәм ултыртылған йәш ағастарҙы общественный һаҡлау аҫтына алырға кәрәк.

«Урман аҙнаһын» үткәреү һәм йәшелләндереү эштәрен ойоштороу өсөн БАССР Министрҙәр Советы эргәһендә түбәндәге составта комиссия ойошторолдо: БАССР Министрҙәр Советы Председателенең урынбаҫары иптәш Кошелев — комиссия председателе, урман хужалығының Башҡортостан управлениеһы начальнигы иптәш Чеботарев — комиссия председателе урынбаҫары һәм комиссия члендәре: иптәш Ковалев — ВЛКСМ Өлкә Комитеты секретаре, иптәш Зайцев — урман һәм һал эшселәре профсоюзы өлкә комитеты председателе, иптәш Рязанов — БАССР Мәғариф Министре урынбаҫары.

Ҡала һәм район Советтәре исполкомдары председателдәре һәм ВКП(б)-ның район комитеттәре секретарҙәре ҡала һәм район Советы исполкомдары председателенең урынбаҫары етәкселегендә «Урман аҙнаһын» үткәреү буйынса комиссиялар ойошторорға, уға член итеп ВЛКСМ райкомы һәм лесхоз вәкилдәрен индерергә тейештәр.

ВЛКСМ Өлкә Комитетына, урман һәм һал эшселәре профсоюзының өлкә комитетына, өлкә профсоюз ойошмаларына, урман хужалығы управлениеһына, Урман промышленносе, Һаулыҡ һаҡлау, Ауыл хужалығы, Мәғариф һәм Коммуналь хужалыҡ Министерстволарына «Урман аҙнаһы» үткәреүгә актив ҡатнашыу, үҙ ҡарамаҡтарындағы учреждение һәм ойошмаларға тейешле күрһәтмәләр биреү тәҡдим ителә. Урман хужалығының Башҡортостан управлениеһы «Урман аҙнаһын» түләүһеҙ йәшелләндереү материалы менән тәьмин итергә, ағас ултыртыусы эшселәргә һәм урманды һаҡлауҙа специалистәр көстәре менән практик ярҙам күрһәтергә тейеш.

Райкомдың боевой ярҙамсыһы

Дәүләкән районы — республикабыҙҙың иң алдынғы игенселек райондарының береһе. Ул — ауыл хужалығында һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәштең инициаторы. Был район сәсеү майҙаны, урожайлылыҡ, мал һаны һәм уның продукт биреүсәнлеге буйынса быйыл уҡ инде һуғышҡа тиклемге кимәлгә етеү алдында тора. Үткән йылда ул урожай алыу планын 25,8 процентҡа арттырҙы һәм малсылыҡ буйынса ла байтаҡ уңыштарға өлгәште.

Был гүзәл күрһәткестәргә ирешеүҙә район газетаһы «Колхозсы»ның роле ҙур булды. Газета, үҙенең күп һанлы активы менән, һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙа ВКП(б) райкомының боевой ярҙамсыһы булып әүерелде.

Яңылыҡҡа ынтылыу һәм эштә инициатива күрһәтеү — «Колхозсы» газетаһының иң яҡшы сифаты. Үҙенең активына таянып, редакция мөһим һәм хәл иткес мәсьәләләрҙе күтәреп сыға белә. Өлгәшелгәндәрҙе ныҡытыуға ярҙам итә, етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу рәүештә тәнҡитләй һәм файҙаланылмаған мөмкинлектәрҙе асып бирә. Миҫал өсөн шундай фактыны алырға мөмкин. Район дөйөм алғанда яҙғы сәсеүгә әҙерлекте уңышлы тамамлағайны. Ләкин большевистик газетаны был хәл тынысландырманы. Редакция, ВЛКСМ райкомы менән берлектә, колхоздарҙың яҙғы сәсеүгә әҙерлеген тикшереү буйынса хәбәрселәр рейде үткәрҙе. Рейдтә 200-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты. Хәбәрселәр 35 колхоздың баҫыуҙарында, келәттәрендә, тимерлектәрендә һәм ат һарайҙарында булып, орлоҡ туплауҙы, ауыл хужалығы машиналарын һәм сбруйҙарҙы ремонтлауҙы, тартыу көстәрен әҙерләүҙе һәм агротехник саралар планын үтәүҙең торошон ентекләп өйрәнделәр. Рейдтең йомғаҡтары правление ултырыштарында, комсомол һәм партия йыйылыштарында тикшерелде. Хәбәрселәр фактыларҙы билдәләү менән генә сикләнмәйенсә, асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә үҙҙәре актив ҡатнаштылар. Уларҙың тәҡдиме менән, районда агротехник саралар планын үтәүҙе тамамлау буйынса удар декада үткәрелде. Хәҙер район яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән башлап ебәрҙе.

Газета етешһеҙлектәрҙе һәм улар өсөн ғәйепле кешеләрҙе тәнҡитләү менән генә сикләнмәй. Ул алдынғы тәжрибә трибунаһы, социалистик ярыш уты менән янып ауыл эшсәндәре өсөн үҙ-ара хәбәрләшеү средствоһы булып тора. Газета битендә районның колхозсылары, колхоз председателдәре, МТС һәм совхоз директорҙары, баҫыусылыҡ һәм трактор бригадаһы бригадирҙары һәм звеноводтар үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашып сығыш яһайҙар.

Һүрәттә: Дәүләкән район газетаһы редакторы иптәш **Р. А. Суфиянов.**

Дәүләкән районы колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре, игенселәрҙең Бөтә Союз социалистик ярышына ҡушылып, сәсеү майҙанын артабан киңәйтеү, урожайлылыҡты тағы ла күтәреү буйынса ҙур йөкләмәләр алдылар. Бары тик бойҙай сәсеү майҙанын ғына үткән йылға ҡарағанда 18.017 гектарға арттырыу планлаштырылды. Газета был йөкләмәләрҙең үтәлешен тәьмин итеүгә бөтә көсөн һәм ойоштороусанлыҡ һәләтен бирә, партия ойошмаларын «ауыл крәстиәндәренең был патриотик башлап ебәреүҙәренең башында торорға һәм «алған йөкләмәләрҙе үтәүҙә колхозсыларға бөтә яҡлап ярҙам итеүгә» саҡыра. Үҙенең баш мәҡәләһендә газета былай тип яҙҙы:

«Бригада һәм звеноларҙың эшен яҡшы ойошторғанда, яҙғы сәсеү эштәренә өлгөлө әҙерләнгәндә һәм агротехника сараларын киң күләмдә ҡулланған ваҡытта ғына алынған йөкләмәләрҙең уңышлы үтәләсәген колхоз етәкселәре, партия һәм совет ойошмалары бер генә минутҡа ла онотторға тейеш түгелдәр».

Редакция алдынғыларҙың өлгөһендә быға ирешеү юлдарын күрһәтә. «Совхоз алған йөкләмәләрҙе үтәү өстөндә», «Улар үҙ һүҙҙәрен практик эш менән аҡлайҙар» тигән хәбәрҙәрҙә ул үҙ уҡыусыларын Дәүләкән бөртөклө ашлыҡ совхозының һәм «Ирек» колхозының юғары урожай звеноһы етәкселәре Таһирова һәм Ильясов иптәштәрҙең эш тәжрибәләре менән таныштырҙы.

«Партия тормошо» бүлеге «Колхозсы» газетаһының битендә иң мөһим урынды алып тора. Редакция партия эшенең көн үҙәгендә торған хәл иткес мәсьәләләрен төп ала белә һәм уларҙы тормошҡа ашырыута тәүге партия ойошмалары секретарҙарының иғтибарын юҡалта. Хәҙерге көндә ауыл партия ойошмалары алдында яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүҙән дә мөһимерәк бурыс юҡ. Шуға күрә лә, «Ауылда партия-политик эште көсәйтергә» тигән мәҡәләлә газета былай тип яҙа:

«Яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә тәүге партия ойошмаларының роле әйтеп бөтергеһеҙ ҙур. Партияның һәр бер ойошмаһы бөтә партия-политик эште яҙғы баҫыу эштәрен үҙ ваҡытында уңышлы итеп үтәүгә, социалистик баҫыуҙарҙан юғары урожай алыуҙы тәьмин итеүгә йүнәлдерергә тейеш».

Газета, тәүге партия ойошмалары менән тығыҙ бәйләнеш тотоу арҡаһында, партия эшендәге һәр бер яңылыҡты, уңышлы йәки етешһеҙ яҡтарҙы ваҡытында күрә һәм уларға баһа бирә. Был яҡтан «Ике ойошма, ике төрлө эш» тигән мәҡәлә бик характерлы. Бында беҙ түбәндәге юлдарҙы уҡыйбыҙ:

«Мерәс» колхозы партия ойошмаһы колхоз правлениеһенең хужалыҡ эштәренә тейешле контроль яһамай. Шул арҡала колхоз 1947 йылда хужалыҡ эштәрен ҙур етешһеҙлектәр менән тамамланы...

...«Өршәк» колхозы эргәһендәге тәүге партия ойошмаһы, бынан алты ай элек кенә төҙөлеүгә ҡарамаҫтан, үҙ эшен яҡшы ойошторған. Коммунистар колхоздың хужалыҡ эштәрендә актив ҡатнашалар һәм хужалыҡ-политик бурыстарҙы үтәүҙә ойоштороусылар булып торалар».

1947 йылда юғары урожай алыуға өлгәшкән һәм 1947 йылда яҙғы сәсеүгә әҙерлекте өлгөлө тамамлаған өсөн Дәүләкән районының юғары урожай мастерҙарынан бик кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, 200-ҙән артыҡ кеше орден һәм медалдәр менән наградланды. Шулар иҫәбенән, «Колхозсы» газетаһының редакторы Рәхим иптәш Суфияновҡа «Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ» ордены бирелде. «Колхозсы» газетаһы һәм уның күп һанлы хәбәрселәренең хеҙмәте партия һәм хөкүмәтебеҙ тарафынан юғары баһаланды. Газетала баҫылған «Колхозсылар яуабы» тигән шиғырҙа былай тиелә:

«Беҙ шат бөгөн
Данлы хеҙмәт өсөн
Орден ялтырағас түштәрҙә,
Ант итәбеҙ
Колхоз ҡырҙарында
Бөйөк намыҫ менән эшләргә».

«Колхозсы» газетаһының работниктәре һәм уның бөтә хәбәрселәре был антҡа тоғро булып ҡалырҙар һәм быйыл тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәштә ВКП(б) райкомына, районның бөтә партия ойошмаларына эшлекле ярҙам күрһәтерҙәр, тип ышаныс менән әйтергә мөмкин.

Яр. Вәлиев.

Район газеталарын таратыуҙы контроль аҫтына алырға

Республикала барлығы 101 район һәм ҡала газеталары сыға. Ләкин был газеталарҙы уҡыусыларға таратыу, Архангель, Ҡариҙел, Дыуан, Борай, Мишкә, Балтас райондарын иҫкә алмағанда, ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Ағымдағы йылдың 1 мартына булған иҫәп буйынса ни бары 135 мең дана газета таратылған, был раҫланған тираждың ни бары 64.3 процентен тәшкил итә.

Бигерәк тә Әбйәлил районында район газетаһын таратыу эше йомшаҡ ҡуйылған. Союзпечаттең район ойоштороусыһы иптәш Абдуллина раҫланған тираждағы 2 мең дананың 700 данаһын ғына таратҡан. Әлшәй районы ойоштороусыһы «Сталинсе» газетаһын тираж буйынса 1650 дана таратырға тейеш булһа, ни бары 581 дана ғына таратҡан.

Шундай ҡәнәғәтләнмәслек хәл Ҡырмыҫҡалы, Кушнаренко, Ауырғазы һәм башҡа райондарҙа ла бар. Был райондарҙың «Союзпечать» работниктәре яңы шарттарға яраҡлы итеп үҙ эштәрен ҡайтанан ҡора алмағандар, газеталарҙы таратыуҙа оператив методтар ҡулланмайҙар. Улар урындағы радио аша иғландар биреүҙе лә ойоштормайҙар, общественный ойошмаларҙа, конторарҙа рекламалар яһамай, газета таратыу буйынса эшләүселәр колхоздарға, совхоздарға, МТС-тарға сыҡмайҙар.

Район һәм ҡала газеталарын таратыу буйынса артта ҡалған райондар был өлкәләге өҙөклөктө тиҙ көндә бөтөрөргә тейештәр.

М. А. Балдина,
Матбуғатты таратыу һәм экспедировать итеү буйынса өлкә бүлек начальниге.

Эшселәр библиотекаһында

Машиналар төҙөү заводының эшселәр библиотекаһы Черниковскийҙағы бай библиотекаларҙың береһе булып һанала. Ул үҙенең 30 мең данаҙан артыҡ китап фонды менән эшселәрҙең һәм интеллигенцияның әҙәбиәткә үҫә барған талаптарын тәьмин итә.

Бында Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин әҫәрҙәренең тулы йыйынтыҡтары, төрлө белешмәләр, күргәҙмә әсбаптар, шулай уҡ художестволы әҙәбиәттән рус классиктарының һәм совет яҙыусыларының әҫәрҙәре бар. Балалар әҙәбиәте бүлеге лә бик бай.

Библиотеканың өс меңдән артыҡ уҡыусыһы бар. Мастер В. Квитковский, конструктор В. Полин, слесарь И. Трифинович, машинистка А. Гусева, техник-контролер Д. Давыдов иптәштәр иң актив уҡыусыларҙан һаналалар.

И. Нигмәтуллин.

БАҪЫУ ЭШТӘРЕНӘ—ЮҒАРЫ ТЕМП!

Йөкләмәләрҙе үтәү өсөн эш башланды

ЯНАУЫЛ. (Телефон аша). СССР Верховный Советы Президиумының Указын радио аша ишетеү менән ук «Таң» колхозында күп кенә колхозсылар [illegible] йыйылыш үткәрҙеләр.

Был йыйылышта колхоз председателе иптәш Яхин беренсе булып сығыш яһаны.

— Указда әйтелгәнсә, хәҙер күп йыллыҡ үлән орлоктарынан юғары урожай алыусыларға ла Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә. Был игенселектең [illegible] культураларын күтәреүгә һәм малсылыҡтың [illegible]. Шуға күрә лә быйыл беҙ үлән орлоҡ сәсеүҙе бигерәк тә арттырабыҙ, уны 50 гектарға еткерәбеҙ һәм үләндең һәр бер гектарынан кәмендә 5-әр центнер орлоҡ алыу бурысын ҡуябыҙ, — тине.

Алдынғы баҫыусылыҡ бригадиры иптәш Гилметдинов үҙенең сығышында арыштың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алырға, иртә культуралар сәсеүҙе 6 көндә эшкә сифатлы итеп үткәрергә һүҙ бирҙе.

— Юғары урожай алыу ул звеноларыбыҙҙың үҙ участкаларында арыу-талмай эшләүҙәренә бәйләнгән. Мин партия һәм хөкүмәттең беҙҙең тураларҙа хәстәрлеген [illegible] быйыл колхоз баҫыуҙарында тағы ла яҡшыраҡ эшләү, 10 гектар майҙанда арыштың һәм 10 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алыуҙы [illegible] һәм бөтә звеноларҙы ла социалистик ярышҡа саҡырам, — тине звеновод иптәш Рахманова.

Бөтә колхозсылар ҙа алдынғы звеноларҙан [illegible] быйыл 120 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 20-шәр центнер, э орлоҡ участкаһында 30-ар центнер урожай алырға, иртә культуралар сәсеүҙе 8 көндә, [illegible] көндә тамамларға йөкләмә алдылар һәм иртәгәһенә үк баҫыуға сығып, алған йөкләмәләрен үтәү өсөн ныҡлы эшкә башланылар.

М. Фәтхов.

Тоташ массивтең өлгөрөүен көтәләр

ҮРГЕ-ҠЫЙЫҒЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районың алдынғы колхоздары яҙғы баҫыу эштәренә ҙур әҙерлек менән һәм ойошҡан рәүештә башланылар. Киров, Сталин, Тимирязев исемендәге һәм башҡа колхоздар бик ҙур майҙанда ужымдарҙы аҙыҡландырҙылар һәм тоташ массивтең өлгөрөүен көтмәйенсә, мөмкинлек тыуыу менән уҡ һабанға төштөләр.

Киров исемендәге колхозда бөтә бригадалар һәм звенолар ҙа Беренсе Май байрамы көндәрен баҫыуҙа улар эш менән үткәрҙеләр. Иптәш Шәрәфетдинов етәкселек иткән трактор бригадаһы ла беренсе майҙа эшкә башланы.

Ләкин күп кенә колхоздарҙа төрлө сәбәптәр табып, баҫыу эштәрен башлауҙы һуҙалар, тоташ массивтең өлгөрөүен көтәләр. Мәҫәлән, «Һабансы» колхозында күптән уҡ сәсеү эштәрен башларға мөмкин ине. Ләкин сәсеү орлоҡтарына яровизация үткәрелмәгәнлектән был эш һуҙыла.

— Колхозда бер генә кеше лә инсек яровизлаштырырға белмәй, — тип зарланалар колхоз етәкселәре. Участковый агроном иптәш Нуркаев та был эштә колхозға практик ярҙам күрһәтмәй.

«8-се март» колхозында ла баҫыу эштәрен башлау өсөн тоташ майҙандың кибеп бөтөүен көтәләр. Бары тик 7 гектар ужым аҙыҡландырылған. Орлоҡтарҙы яровойлаштырыу әле булһа башланмаған. Тракторҙар эшкә башламай, ҡиммәтле ваҡытты бушҡа үҙғаралар.

— Яҙ яңы ғына башланды, өлгөрербеҙ әле, — ти бик тыныс ҡына колхоз председателе иптәш Габов.

Әбдрәәк МТС-ы зонаһындағы 19 колхоздан береһе лә баҫыу эштәренә башламағандар. Тракторҙар әле булһа баҫыуға сыҡмағандар. МТС директоры иптәш Юнусов баҫыу эштәре менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай. Хатта ул нисә гектар майҙанда ужымдар аҙыҡландырылырға тейешлеген дә белмәй. МТС агрономдары колхоздарға был эште ойоштороуҙа һәм орлоҡтарҙы яровойлаштырыуҙа тейешле ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Быйыл яҙҙың бик һуҡлап килеүе баҫыу эштәрен айырыуса ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәреүҙе талап итә. Ҡыйғы район ауыл хужалығы бүлеге һәм МТС, колхоз етәкселәре тәүге көндөң кәмселектәрен ашығыс бөтөрөргә тейешләләр.

Н. Ғәлимов.

57 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде

ДӘҮЛӘКӘН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Башҡортостан» колхозында баҫыу эштәре ҡыҙыу бара.

Трактористтарҙан Даутов, Муллабаев иптәштәр эшкә башлауҙың тәүге көндәренән уҡ эш нормаларын арттырып үтәйҙәр. Улар колхоз менән төҙөшкән договорҙарҙы срогында үтәп сығыу өсөн көрәшәләр.

Колхозда бөтәһе 80 гектар ер һөрелдә, 40 гектар майҙанда бойҙай, 17 гектар майҙанда көнбағыш сәселде. 150 гектар майҙанда тырматыу үткәрелде.

Горшаков ауыл Советындағы «Ҡыҙыл Урал» колхозында 18 һабан менән сиҙәм һөрөү үткәрелә. Һабансыларҙан Ибраһимов, Ибәтуллин, Хәмзин, Саматов иптәштәр көндәлек эш нормаларын 140 — 150 процентҡа үтәйҙәр.

Ғ. Идрисов.

Норма арттырылып үтәлә

ПЕТРОВСК. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Петровск МТС-ының иптәш Карюгин етәкселек иткән трактор бригадаһы Маҡар районында беренсе булып баҫыу эштәрен башланы.

Бригада «Герой труда» колхозында тәүге көнөндә үк 17 гектар сиҙәм һөрөп, Беренсе Май байрамын көндәлек заданиене үтәп ҡаршыланы.

Ғ. Ҡотлобаев.

Ерҙе предплужниклы һабандар менән һөрөргә

Быйыл республикабыҙҙың колхоздары яҙғы сәсеү планын үтәү өсөн 80 процентҡа яҡын ерҙе яҙ һөрөп сәсергә тейештәр.

Ер һөрөү агротехникаһын яҡшы итеп үтәү урожайҙы күтәреүҙә мөһим фактор булып тора. Ер һөрөүҙә төп ике талапты: иртә срокта һәм сифатлы, тәрән итеп һөрөүҙе иҫтән сығарырға ярамай. Предплужниклы һабандар менән һөргәндә генә был талаптарҙы тулыһынса үтәргә мөмкин.

Предплужник ул пар ерен, йәки туңға һөргәндә генә тейешле һөҙөмтәне бирә ала, ә яҙ һөргәндә уның кәрәге юҡ, — тиҙәр ҡайһы берәүҙәр. Был хата һәм зарарлы ҡараш.

Үҙған йыл Өфө тәжрибә баҫыуында предплужниктең урожайҙы күтәреүҙә булған роленә һынау үткәрелде. Предплужникһеҙ һабандар менән 20 сантиметр тәрәнлегенә яҙ һөрөлгән ерҙең бер гектарынан 22.1 центнер бойҙай урожайы алынды. Шул уҡ ваҡытта ҡый үләне орлоҡтары ла күп булды. Предплужниклы һабандар менән шул уҡ тәрәнлеккә яҙ һөрөлгән ерҙән 24.3 центнер урожай алынды һәм ҡый үләне орлоҡтары икеләтә кәм тәшкил итте.

Был бик ҙур һабаҡ булырлыҡ практик тәжрибә: яҙ көнө лә предплужниклы һабандар менән һөрөү аша һәр бер гектарҙан кәм тигәндә 2 центнер өҫтәмә урожай алырға мөмкин икәнлеген күрһәтә.

Предплужниклы һабан менән һөрөүҙән артыҡ урожай алыу, бөтәһенән элек ерҙе культуралы итеп эшкәртеүҙән килә. Предплужник ер өҫтөндәге саңлы тупраҡ ҡатламын бураҙна төбөнә һала, өҫкә структуралы тупраҡ сығарып ҡаплай. Тупраҡ көсе яҡшы ваҡлана, бураҙналар тигеҙ була һәм ер ҡый үләненән таҙарып ҡала.

Предплужниклы һабан менән сифатлы итеп һөргәндә тупраҡты сәсеү алдынан (һабанға тағылған тырмалар менән) бер әҙҙән тырматыу ҙа етә.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарында 1948 йылда тракторҙар менән һөрөлә торған ерҙең кәмендә 50 проценте предплужниклы һабандар менән һөрөлөргә тейеш, тиелә. Беҙ был ҡарарҙы яҙғы һөрөү ваҡытында уҡ үтәй башларға тейешбеҙ. Шул шарттарҙа тик яҙғы культуралар буйынса ғына йөҙ меңләгән центнер өҫтәмә урожай алып буласаҡ.

Предплужниклы һабандарҙың уңышлы эшләүе уларҙы дөрөҫ итеп көйләүгә бик ныҡ бәйләнгән. Улар һөрә башлауға тиклем агроном һәм механик ҡатнашлығы менән кәрәкле тәрәнлеккә һәм алып һөрөү киңлегенә көйләнергә тейештәр. Һөрөләһе ерҙе үҙған йылғы һалам ҡалдыҡтарынан һәм төрлө сүп-сарҙан яҡшылап таҙартырға кәрәк.

Агроном В. Ғирфанов.

Полиграфия промышленносенең эшен артабан яҡшыртыу өсөн

Һуғыштан һуңғы сталинсе яңы биш йыллыҡта китап, газета, журнал һәм һәр төрлө брошюралар баҫтырыу эше ныҡ үҫә. Республикабыҙҙың полиграфия промышленносе 1947 йылда валовой продукция сығарыуҙы 1940 йылға сағыштырғанда 27,8 процентҡа арттырҙы, ә 1948 йылда продукция биреү 1947 йылдағы фактик үтәлешкә ҡарағанда 6,4 процентҡа күберәк буласаҡ. Ләкин былар бөтәһе лә хеҙмәтсәндәрҙең баҫма әҙәбиәткә булған культура талабын үтәп еткереүҙән алыҫ әле.

1947 йылдың һәм 1948 йылдың беренсе кварталы йомғаҡтары билдәләнгән пландарҙы үтәүҙә ҙур ғына өлгәшеүҙәр булыуын күрһәтәләр. Улар билдәле, коллективтарҙың эште ойоштора белеү һәм стахановсы хеҙмәт һөҙөмтәһе булып тора. Республикабыҙҙа өлгөлө эшләүсе күп кенә типографиялар бар.

Черниковск ҡала типографияһы (директоры иптәш Терентьев) үҙған йылда производство планын срогынан ике ай алда үтәне һәм йыл аҙағына тиклем пландан тыш күп һанда продукция бирҙе. 1948 йылда ла типография эш темпын төшөрмәй, ә арттырғандан-арттыра бара. Типография ағымдағы йылдың беренсе квартал планын 143,7 процентҡа үтәне һәм 32300 һум файҙа бирҙе. Типографияла күп процесстар механизациялаштырылды, яңы полиграфик машиналар үҙләштерелде.

Ҡыйғы район типографияһы (директоры иптәш Аллаяров) халыҡ-ара байрам көнө — 1 Майҙы ярты йыллыҡ планды үтәү менән ҡаршыланы. Октябрьск, Благовещен ҡалалары, Краснокам, Әлшәй, Благовар район типографиялары ла шулай уҡ яҡшы эшләйҙәр.

«Октябрь натиҫкаһы» типографияһы иң эре типографияларҙың береһе. Бында тәжрибәле эшселәр бар. Улар иҫәбенә печатниктәр Никифорова, Мандрова, Мәғафурова, Андреева, Пунтакова иптәштәр инәләр. Улар дүрт айҙа ярты йыллыҡ норма үтәнеләр.

Өлкә газета-журналдар типографияһында эшләүсе линотипистәр Арсланова, Ғәйнетдинова, Казаков, Шаһиәхмәтова, Вялова, Иванова, газета баҫыусы Рафиков иптәштәр айырыуса юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Улар ярыш йөкләмәләрен арттырып үтәйҙәр. Ошо уҡ типографияның начальнигы коммунист иптәш Архипов булған цинкография цехы коллективе үҙ йөкләмәләрен намыҫлы үтәп килә.

Полиграфия предприятиеларҙа эшендә ошондай ыңғайлы фактылар һәм уңыштар булыу менән бергә, сөрьөз етешһеҙлектәр ҙә юҡ түгел. Беҙҙең типографияларыбыҙҙа әле планлы нагрузка юҡ. Беҙҙең издательстволарыбыҙ заданиеларҙы һуңлап тапшыралар. Һөҙөмтәлә эштә штурмовщина башлана. Тапшырылған оригиналдарҙың йыш ҡына сифаты насар була.

Типографияларҙа алдынғы эш методтары киң популярлаштырылмай, бөтә цехтарҙың да ритмле эштәренә өлгәшелгәне юҡ әле. «Октябрь натиҫкаһы» типографияһында күпселек цехтар, бригадалар пландарҙы үтәйҙәр. Ә китап тектлау һәм линотип цехтары насар эшләйҙәр, тотош типографияны артҡа һөйрәйҙәр. Ә дирекция һәм партия ойошмаһы был өҙөклектең төп сәбәптәрен тикшермәйҙәр, уларҙы бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрмәйҙәр. Һәм алдынғы эш тәжрибәләрен таратмайҙар.

Үткән йылда полиграфия промышленносе предприятиелары 70-тән артығыраҡ полиграф машиналар менән йыһазландырылды. Уларҙы үҙләштерә барыуға ҡарап, баҫма продукциялар сығарыуҙа арта барырға тейеш. Ләкин айырым типографияларҙа „ был яңы оборудованиеләр кәрәгенсә файҙаланылмағанлыҡтарын күрһәтеп үтергә кәрәк. Мәҫәлән, Стәрлетамаҡ, Ишембай типографияларына үҙған йыл уҡ ҡуйылған газета-журналдар баҫа торған машиналарҙы тик быйыл ғына эксплоатациялай башлайҙар. Предприятиеларҙың етәкселәре машиналарҙың насар файҙаланылыуын кадрҙарҙың етешмәүе менән аҡларға маташалар. Ә шулай ҙа кадрҙарҙы әҙерләү буйынса конкрет бер төрлө лә сара күрмәйҙәр. Ҡыҙғаныска ҡаршы, Издательство һәм Полиграфия Управлениеһе лә был мәсьәләлә йомшаҡлыҡ күрһәтә, предприятие етәкселәренән машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙы ҡиҫкен рәүештә талап итмәй.

Беҙ уҡыусыларыбыҙға яҡшы сифатта баҫылған газета-журналдар, китап, брошюралар бирергә тейешбеҙ. Шулай ҙа беҙҙең предприятиелар тарафынан сығарылған продукциялар үҙҙәренең сифаттары яғынан был талаптарға яуап биреүҙән алыҫ торалар әле. Бигерәк тә район газеталарының техник яғы һәм сифаты түбән. Мәҫәлән, Кушнаренко районының «Яңы еңеүҙәргә», «Сталинец» газеталары бысраҡ баҫылалар. Уларҙың техник оформлениеһе лә бик насар була. Шуның өсөн дә был газеталар районда бик аҙ күләмдә генә таратылалар. Шишмә районының «Сталинсе», «Красное знамя», Күгәрсен районының «Знамя коммуны», «Коммуна байрағы» һәм башҡа ҡайһы бер район газеталары тураһында ла шуны әйтергә кәрәк.

Бындай хәлдәргә артабан юл ҡуйылырға тейеш түгел. Типографиянан брак продукция сығарған өсөн ғәйеплеләрҙе ҡаты яуаплылыҡҡа тарттырырға кәрәк.

Беҙҙең өлкә газеталар район газеталарына даими рәүештә күҙәтеүҙәр бирәләр. Ләкин был күҙәтеүҙәрҙә район газеталарының техник оформлениеһена иғтибар бирелеп еткерелмәй. Артабан өлкә газеталар район газеталары тураһындағы мәсьәләне бөтә яҡлап яҡтыртырҙар тип ышанырға кәрәк.

Полиграфия алдына ҡуйылған бурыстарҙың уңышлы рәүештә үтәлеүе кешеләр — кадрҙар хәл итә. Шуға күрә кадрҙар әҙерләүгә һәм ҡайтанан әҙерләүгә айырыуса иғтибар бирелергә тейеш. Хәҙерге көндә республиканың полиграфия предприятиеларында техник уҡыу селтәре киңәйтелә. Быны артабан нығытырға кәрәк.

Шуның менән бер рәттән полиграфия предприятиелары быйыл һөнәрселек училищеһен тамамлаусы йәш кадрҙар менән тулыландырыласаҡ. Уларҙы тулы әҙерлек менән ҡаршыларға, эш һәм тормош шарттары тыуҙырырға кәрәк.

Партия һәм хөкүмәт полиграфия промышленносенә ғәйәт ҙур иғтибар бирә. Быйыл ике республикан типография ныҡ киңәйтеләсәк һәм реконструкциялаштырыласаҡ.

Илебеҙҙең үҫә барған халыҡ хужалығын етерлек күләмдә һәм яҡшы сифатта баҫма продукциялар менән тәьмин итеү — полиграфистарҙың мөһим бурысы. Уны тормошҡа ашырыу өсөн полиграфия эшселәре, инженер-техник работниктәре икеләтә арттырылған энергия менән эшләргә тейештәр.

С. Латипов,
БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге Издательство һәм полиграфия Управлениеһе начальнигы.

Сит илдәрҙән телеграммалар

СИТ ИЛДӘРҘӘ 1 МАЙҘЫ БАЙРАМ ИТЕҮ

Болгария

Бөтә Болгария Беренсе Майҙы тантаналы һәм шатлыҡлы рәүештә байрам итте.

Республиканың байрамса биҙәлгән башҡалаһында—Софияла бик ҙур демонстрация булды. Бында ямғыр булыуға ҡарамаҫтан, ҡаланың 300 меңдә ашыу хеҙмәтсәне һәм тирә-яҡтағы ауылдарҙың хеҙмәтсәндәре ҡатнаштылар. Демонстрация Болгария халҡының нығынып берҙәмлеге, уның тыныслыҡ өсөн, демократия һәм милли бойондороҡһоҙлоҡ өсөн һәм һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәштә батыр торорға саҡырыусы лозунгылар аҫтында үтте.

Венгрия

Венгрияла Беренсе Май байрамдары халыҡ берҙәмлеге билдәһе аҫтында үттеләр. Быйыл беренсе тапҡыр булараҡ Беренсе Май демонстрацияларында эшселәр менән бергә ваҡ хужалар партияһы һәм милли-крестьяндар партияһы ҡатнашты. Колонналар башында предприятиеләрҙең алдынғы кешеләре йөрөнәләр. Будапешттең майҙандары һәм урамдары уларҙың портреттары менән биҙәлгән.

Венгрияның башҡалаһында демонстрация 7 сәғәттән артығыраҡ дауам итте. Ҡала йәшәүсе һәм ҡаланың тирә-яҡтарында йәшәүсе ярты миллиондан артыҡ кеше был көндө геройҙар майҙаны аша үтте.

Будапештта Беренсе Май байрамдары тынға тиклем һуҙылды.

Австрия

Австрияла Беренсе Майҙы байрам итеү илдә демократик көстәрҙең үҫешен күрһәтте. Хакимлек итеүсе буржуазияның халыҡтың алдынғы элементтарын ҡурҡытырға маташыуҙарына ҡарамаҫтан, һәм уң социалистик лидерҙарҙың тарҡатыу тактикаһына ҡарамаҫтан, коммунистик демонстрация Венала ҙур уңыш менән үтте. Ул халыҡ хәрәкәтенең берҙәмлеге өсөн, халыҡ демократияһы өсөн, Австрияны сит ил колонияһына әйләндереүгә ҡаршы лозунгылар аҫтында үтте.

Австрия социалистик партияһы етәкселәренең Беренсе Майҙы коммунистар менән бергә байрам итергә ҡәтғи рәүештә тыйыуҙарына ҡарамаҫтан, күп кенә социалистарҙың коммунистик демонстрация сафтарында йөрөүҙәре Австрия хеҙмәтсәндәренең берҙәмлеккә ынтылыуының асыҡ күрһәтеүе булып тора.

Венала коммунистик демонстрация 3 сәғәткә яҡын дауам итте. Социалистик партия тарафынан ойошторолған һәм сиктән тыш дөйөм характерҙағы лозунгылар аҫтында үткән демонстрациянан ул үҙенең политик күтәренкелеге һәм конкрет боевой лозунгылар менән ныҡ рәүештә айырылып торҙо.

Япония

Токиолағы Беренсе Май митингыһында бер миллионға яҡын кеше ҡатнашты.

Японияның прогрессив профсоюздарының һәм башҡа демократик ойошмаларының митингыла сығып һөйләүсе вәкилдәре реакцион Ашида хөкүмәтенең халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән политикаһын ныҡ тәнҡитләнеләр. Митингыла Япония компартияһының секретаре Токуда телмәр менән сығыш яһаны. Уны көслө алҡыштар менән ҡаршыланылар.

Ҡабул ителгән резолюцияла хеҙмәтсәнләр ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренең берҙәм фронтын төҙөү, бөтә милләт профсоюздарын берләштереү кәрәклеген, Япония хеҙмәтсәндәренә ҡарата репрессиялар политикаһын бөтөрөү кәрәклеген билдәләнеләр. Митингынан һуң демонстрация булды.

Американың оккупацион власттәре Беренсе Май көндә бөтә полиция көстәрен мобилизовать иттеләр. Ҡала өҫтөндә өҙлөкһөҙ рәүештә Американың хәрби самолеттары осоп торҙо.

Берлин

Берлиндә хеҙмәтсәндәрҙең көслө демонстрацияһы булды. Демонстранттар колонналары өҫтөндә ҡыҙыл байраҡтар, транспаранттар һәм плакаттар күренде. Уларҙа немец халҡы өсөн берҙәмлек һәм тыныслыҡ, азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ талаптары яҙылған. Демонстрацияла 700 меңгә яҡын кеше ҡатнашты.

Люстгарт майҙанында митинг булды. Бында Герман Шлимме һәм Берлиндең башҡа профсоюз етәкселәре сығып һөйләнеләр.

Англия секторында берҙәмлек һәм тыныслыҡ яҡлы кешеләрҙең демонстрацияһы менән бер үк ваҡытта раскольник шумахерселәрҙең һәм кайзерселәрҙең контрдемонстрацияһы ойошторолдо. Рейхстаг бинаһы алдында 20 меңгә яҡын обыватель йыйналды. Улар алдында Америка хеҙмәт федерацияһынан Рути һәм Франц Лейман Советтар Союзына ҡаршы йүнәлтелгән телмәрҙәр менән сығыш яһанылар. (ТАСС)

АҠШ-та полиция хәрәкәттәре

НЬЮ-ЙОРК, 2 май. (ТАСС). Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Бирмингам (Алабам штаты) полицияһы өсөнсө партиянан вице-президент постына кандидат һәм «Көньяҡ штаттарҙағы негр йәштәре конгресы» съезында сығыш яһарға тейеш булған сенатор Тэйлорҙы ҡулға алған. Был конгресс раса дискриминацияһын бөтөрөүҙе һәм негрҙарға тигеҙ хоҡуҡтар биреүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуя.

Делегаттар Конгресс съезына Бирмингамға 1 майҙа килделәр, ләкин улар съезды үткәреү өсөн бина таба алмау сәбәпле йыйыла алмағандар. Урындағы полиция начальнигы, делегаттарға съезд үткәрергә рөхсәт ителмәйәсәк, тип белдергән.

Бөтә 170-кә яҡын делегат — негрҙар һәм аҡ тәнлеләр — негрҙар сиркәүендә йыйналғандар, ләкин полиция унда килгән һәм «кешелек донъяһының яҡшы көн-күреше тәьмин итеү буйынса Көньяҡ конференция» исемле прогрессив ойошманың съезда сығыш яһарға тейеш булған вәкиле Домбровскийҙе, Производство Профсоюздары Конгресына инеүсе моряктарҙың берләшкән профсоюзына инеүсе Феррейзе, «Азат тыныслыҡ өсөн көрәштә Америка йәштәре» ойошмаһының Нью-Йорктан килгән вәкиле Сеинте һәм сиркәү хеҙмәткәре негр Оливерҙе ҡулға алған.

Полиция, аҡ делегаттар негрҙарҙан айырылмай торып, ултырыш үткәрергә рөхсәт ителмәйәсәге тураһында иғлан иткән. Шул саҡта делегаттар негрҙарҙы аҡ тәнлеләрҙән бүлеү өсөн сиркәү эсендә барьер яһағандар һәм ултырышты дауам иттергәндәр.

Бында һуңғараҡ ҡалып килгән сенатор Тэйлор полиция тарафынан негрҙар өсөн билдәләнгән ишек аша сиркәүгә инергә уйлаған. Полиция уны «тәртип боҙоуҙа» ғәйепләп, ҡулға алған.

«Көньяҡ штаттарҙағы негр йәштәре конгресының» съезы кисектерелгән. Бирмингамда яңы ултырыш билдәләнермә, юҡмы икәнлеге билдәле түгел. Сенатор Тэйлор күп тә үтмәй залог аҫтында азат ителгән.

ВЦСПС ПРЕДСЕДАТЕЛЕ КУЗНЕЦОВТЫҢ РИМДӘ ЯҺАҒАН БЕЛДЕРЕҮЕ

РИМ, 3 май. (ТАСС). «Италия социалиста» газетаһында Америка производство профсоюздары конгресс секретаре Кэррицең интервьюһы (ул, имеш, совет профсоюздарының Маршалл планына ҡарата ҡараш нөктәләре үҙгәрҙе тип белдерҙе) иғлан ителеү айҡанлы ВЦСПС председателе Кузнецов ТАСС-тың Римдәге хәбәрсеһенә түбәндәге белдереүҙе яһаны:

«Кэррицең ошо белдереүе башынан алып аҙағына тиклем ялған булып тора һәм Италияның общественный фекерен алдауға иҫәп тота. Кэрри тарафынан Маршалл планына ҡарата үҙенең ҡаҡшау позицияһын ныҡлау өсөн совет профсоюздарының авторитетен файҙаланыу маҡсатында бындай ҡылыҡтарҙың беренсе тапҡыр ғына билдәләнмәгәнлеген билдәләргә кәрәк».

Кузнецов, совет профсоюздарының ҡараш нөктәһе совет профсоюздарының Маршалл планына ҡарата 1948 йыл 27 февраль декларацияһына асыҡ һәм аҙма-аҙ рәүештә яҙылғайны һәм шунан һуң бер нисек тә үҙгәрмәне, тип айырыуса билдәләне.

Өфө ҡалаһы 1-се номерлы балалар баҡсаһында.
Һүрәттә: Күңел асыу ваҡытында балалар башҡорт халыҡ бейеүҙәрен башҡаралар. Т. Буравин фотоһы.

Культура эштәре хроникаһы

1. Алдағы яңы уҡыу йылына әҙерлек башланылар

Йомағужа районы Әбет ете йыллыҡ мәктәбе (директоры И. А. Әлимғолов) алдағы уҡыу йылы өсөн 40 кубометр утын килтертте. Шулай уҡ Һарыш башланғыс мәктәбе лә (мөдире иптәш Ә. Т. Булатов) алдағы уҡыу йылы өсөн 30 кубометр утын әҙерләп, мәктәп янына ташып ҡуйҙы.

Ремонт үткәреү, мәктәп тирәһен кәртәләү, ағас ултыртыу, мәктәп участкаларына ашлыҡ сәсеү эштәренә әҙерлек башланды. Һарыш башланғыс мәктәбе сәсеү өсөн 20 бот картуф, 0,5 гектар майҙанға сәсеүгә бойҙай орлоғо әҙерләне.

Ә. Исаҡаев.

2. Яҙғы сәсеүҙә драма түңәрәктәре

Әбйәлил районы үҙәгендәге культура йорто, Гусев, Хәлил ауыл Советтәре эргәһендәге драма түңәрәктәре иң алдынғыларҙан иҫәпләнәләр. Февраль, март айҙарында был түңәрәктәр, колхозсылар араһында «Ғәлиәбану», «Ҡыйыу ҡыҙҙар» һәм башҡа пьесаларҙы сәхнәгә ҡуйҙылар һәм бер нисә концерт номерҙәре бирҙеләр. Хәҙер драмтүңәрәк членддәре яҙғы сәсеү ваҡытында колхозсылар һәм хеҙмәтсәндәр араһында спектакль, концерттар биреүгә әҙерләнәләр. Район үҙәгендәге 17 кешенән торған коллектив 37 колхозда буласаҡ.

Ә. Хәсәнов,

Әбйәлил район Советенең культура-ағартыу эштәре бүлеге мөдире.

Рационализаторлыҡ тәҡдимдәре

«Туймазынефть» тресында рационализаторлыҡ һәм уйлап сығарыусылыҡ эше яҡшы ҡуйылған. Үҙған йыл бында 117 рационализаторлыҡ тәҡдим алынып, уның 61-е тормошҡа ашырылған һәм 825 мең һум экономия яһалған. Тәҡдимдәрҙең авторҙарына 37 мең 200 һум аҡса түләнгән. 1948 йылдың 1 кварталында 56 тәҡдим индерелгән, шуларҙан 39 тәҡдимде производствоға индереү һөҙөмтәһендә 217 мең һумға яҡын экономия яһалған.

Был тәҡдимдәрҙең авторҙары—ҡатмарлы эштәр мастеры П. Салов, слесарь П. Бернер, монтер П. Махнев һәм башҡа иптәштәр һаналалар.

Шефлыҡ ярҙамы

Өфө металл штамплау заводы коллективы Шишмә районы Ново-Троицк машина-трактор станцияһына шефлыҡ итә. Заводтың баш инженеры иптәш Васильев МТС-ҡа барып уның нәмәгә мохтаж булыуын тикшереп ҡайтты.

Завод МТС-ҡа 2,5 тонна запас частәр, инструменттар, «НАТИ» тракторҙары өсөн пальцалар ебәрҙе.

ҺӨТ ТАПШЫРЫУҘЫҢ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНЫН ҮТӘНЕЛӘР

Яңауыл районы «Красное знамя», «Ҡыҙыл Байраҡ» һәм Киров исемендәге колхоздар Беренсе Май байрамын государствоға һөт тапшырыуҙың йыллыҡ планын үтәү менән ҡаршыланылар.

«Беренсе Май», Чапаев, Ворошилов исемендәге колхоздар ҙа һөт тапшырыуҙың дүрт айлыҡ планын арттырып үтәнеләр.

М. Фәтихов.

Донья шахмат матч-турнире

Донья чемпионлығына шахмат турнире [illegible] тамамланыуына 7 генә тур ҡала. [illegible]

Союздар йортондағы колонналар залында, 2 майҙа [illegible] тур уйналды. Был турҙа Решевский [illegible] Ботвинник һәм Смыслов — Эйве осрашты.

[illegible]

19 турҙан һуң Ботвинниктың [illegible] очкоһы, Смысловтың [illegible] — 8,5 очко, Решевскийҙың [illegible] — 7,5 очко [illegible] Кереста — 7,5, Эйвеның — 3,5 очкоһы бар.

(ТАСС)

Суд залында

Аферисткаларға хөкөм

[illegible]

[illegible] «[illegible]зил» үткәргәндә ҡулға алыналар.

Өфө ҡалаһының Жданов районындағы 2-се участка халыҡ суды М. Байшеваны һәм Ф. Уразгилдинаны 20-шәр йылға, А. Угарованы 15 йылға ирекһеҙ хеҙмәт итергә хөкөм итте.

Н. Андреев.

Сәғит Агиш

Икенсе ташҡын

(Хикәйә)

Шәрәфи ҡарт семьяһы киске сәйҙе лә тыныс эсә алманы. Самауыр ҡайнап сығыуға, шәлен уң яҡҡа һәлындырып ябынған, Ғәффә ҡарсыҡ килеп керҙе. Ул Хәтирәнең наградаланыуына ҡыуаныр бөтә алмауын, иртәнсәктән бирле әллә нәмә һиҙенеүен һөйләп алды ла, был турала үҙенең әлектән үк белеп йөрөүен теҙеп алып китте:

— Уйлаған алға килә тигәндәре дөрөҫ ул. Бойҙай баш ҡыҫҡан саҡта ҡарт менән больницанан ҡайтып киләбеҙ ҙә Хәтирәләр ерен үтәбеҙ. Ул бойҙайҙарҙың буйы тиһеңме, башы тиһеңме — иҫең дә, аҡылың да китерлек. Ел ыңғайына тулҡынланып, ыуылйып ултыралар, диңгеҙ ҡамышымы ни! (Ә Ғәффә ҡарсыҡтың ғүмерендә бер диңгеҙ күргәне юҡ). Шунан ҡартҡа әйтәм, был бойҙайҙар мин әйтәм, Хәтирә бәхетенә үҫәләр. Ҡарт әйтә: «Теймә, ҡарсыҡ, үҫһендәр, бойҙай — Хәтирә бәхетенә, Хәтирә колхоз бәхетенә үҫә» ти. «Колхозыбыҙ Хәтирә менән дан алыр» тине. Шулай тине, уйлаған алға килде бит.

Шулай итеп, Шәрәфи ҡарттар киске сәйҙе лә ҡунаҡ менән эстеләр. Көндөҙ бер тапҡыр һөйләгән шатлыҡты тағы ла бер рәт ҡабатлап сыҡтылар. Ғәффә ҡарсыҡ аҙаҡҡы сынаяҡты эсеп түңкәргәс, үҙенең бөтә һүҙен былай тип осланы:

— Бәхете лә, даны ла үҙе менән йөрөһөн дә, әйбәт кенә бер егеткә насип булһын инде.

Хәтирә оялып, хатта ҡыҙарып китте. Әсәһе эстән генә: «шулай булһын инде», тип ҡуйҙы. Авылдағы йыйып өлгөрмәнеләр, Хәтирә звеноһынан Гөлнур, Шәрғиә һәм башҡа ҡыҙҙар килеп инделәр. Уларҙың бөтәһе лә яһанғандар, төҙәнгәндәр. Шаттар һәм бик ашыҡҡалар. Өй эсендәге кешеләрҙе, әйберҙәрҙе, тиҙ генә күреп бөтәргә теләгән һымаҡ, ялт-йолт ҡаранала-лар ине. Ләкин, ғәҙәттәренсә, сырҡыллап көлөшмәйҙәр. Ғәффә ҡарсыҡтан, бигерәк тә сәстәре ағара башлаған Шәрәфи ҡарттан тартыналар.

— Бына әрмиән дә килеп етте, — тине Шәрәфи ҡарт Хәтирәгә, үҙе ҡыҙҙарға урынды иркенәйтер өсөн ултырғысын артҡараҡ тартып ултырҙы. Ҡыҙҙар Хәтирәне алып сығып китергә тип килгәндәр. Хәтирә тиҙ генә мамыҡ шәленә үрелгәйне, Гөлнур уны туҡтатты:

— Шул кәйөнсә сыҡмаһың инде, өҫ-башыңды төҙәт, күлмәгеңде алыштыр.

— Эйе лә бәһа, — тип ҡыҫылды Ғәффә ҡарсыҡ. — яндырып йөрөп ҡалығыҙ. Юҡһа, бөгөн-иртән тигәндәй эшегеҙ тағы ла ҡыҙыуланып китер.

Ҡыҙҙар эркелеп Хәтирәне икенсе бүлмәгә алып кереп киттеләр. Унан инде уларҙың көмөш тауыштар сығарып көлгәндәре, иҙәндә тылырҙау тауыштары ишетелә ине.

Ҡыҙҙар Хәтирәне төҙәндереп алып сыҡтылар. Улар уны үҙҙәренең урталарында тоталар. Ҡайһы ыңҡа ғына боролһа ла йылмайып күҙенә ҡарайҙар ине.

Хәтирә бөгөн бик шат, тик был шатлыҡ уны бик ныҡ ҡаушата. Бынан бер йыл элек, ташҡын ваҡытында звено төҙөнөләр һәм үҙҙәренә юғары урожай алыу өсөн йөкләмә алдылар. Ул ваҡытта ла Хәтирә бер аҙ ҡурҡына ине. Бөгөнгө кеүек хәтерендә уның: уҡытыусы Солтан ағай урамда тотоп алды ла, сельпо канцелярияһына алып керҙе. Указ тураһында оҙаҡ ҡына һөйләгәс, звено төҙөп, йөкләмә алырға димләне. Хәтирә бер нәмә лә әйтә алмай торҙо. Аҙаҡтан уҡытыусы: «Бәлки, һин үҙеңә ышанмайһыңдыр, ә мин һиңә ышанам. Мин һине ун йыл уҡытҡан кеше. Үҙеңә билдәле булмаған бөтә көсөңдө беләм мин. Хәтерләйһеңме, ун йыллыҡты бөтөрөүгә арналған кисә алдынан мин һиңә биш йөҙ юллыҡ шиғыр ятларға бирҙем. Һин: «ятлай ҙа, һөйләй ҙә алмайым» тинең. Ә нисек һөйләнең? Залда себен осһа ишетелерлек, тынлыҡ ине», — тине. Хәтирә аҫҡы иренен аҙ ғына ҡымтып торҙо ла: «Беләм, Солтан ағай, ул бит шиғыр ятлау һәм һөйләү. Уның иәктәһе, өтөрөнә тиклем әҙер, аҙаҡҡы һүҙенә тиклем алдан яҙылып ҡуйылған. Ә был эш ауыр», тине. Солтан, мыҫҡыл иткән һымаҡ, көлдө: «Әллә һин барған һайын еңелерәк эш осрар тигәйнеңме? Эш ул. Эш, хеҙмәт бәләкәй сана менән тауҙан шыуыу түгел. Сана шыуғанда ла шөберәк киттем тиһәң, ергә аяҡ менән төртергә, тырышырға кәрәк. Һин, совет ҡыҙы булһаң, үҙеңә көн һайын ауырыраҡ һәм данлыраҡ хеҙмәтте йөклә». Хәтирә Солтанға бер һүҙ ҙә әйтмәне. Ә иртәгеһен клубта, колхозсылар алдында, ҡыҙҙар менән звено төҙөп, йөкләмә алды. Шунан һуң, шунан һуң улар эшкә сумып киттеләр. Ғәффә ҡарсыҡ әйтмешләй «игендәре диңгеҙ ҡамышы кеүек булды ла үҫте». Был ысынлап та шиғыр ятлау түгел ине. Шуға бер йыл үтте.

Клубта Хәтирәләрҙе бик күңелле ҡаршы алдылар. Ҡайһы берәүҙәр, ҡаршы килеп, ҡулдарын ҡыҫтылар. Йәштәр генә йыйылырға тейеш булған был кисәлә ололар ҙа бар. Хатта сикә сәстәре ныҡ ҡына ағарған уҡытыусы Солтан да килгән. Ул һаҡалын бик ныҡ ҡырған, галстук та бәйләгән. Ул да ҡыҙҙар янына килеп етте. Ҡыҙҙар уратып алдылар һәм ултырғыс килтереп ҡуйҙылар. Солтандың күҙенән ҡыуаныс йәше тәгәрәргә тора. Шуғамы, күп һөйләргә теләмәй, ҡыҙҙарға ҡарай ҙа:

— Әйттем бит, әйтә килдем, — дән башҡа бер һүҙ ҙә әйтә алмай. Һәм тағы ла береһенән береһе матур, береһенән береһе дәртле булған ҡыҙҙарға һоҡланып ҡарап тора ла:

— Әйттем бит, әйтә килдем бит, — тип ҡуя.

Клуб эне-күҙләрлек итеп яҡтыртылған. Дүрт мөйөштә электр лампаһы яна. Гармонсы Фәйзүк йәштәргә һөйләшергә ирек биреү өсөн баянын тартмайынса тубыҡ өҫтөндә тотоп, «Быларға ниндәйерәк көйҙө ебәрергә икән?» тигән һымаҡ, оҙон муйынын ҡыйшайтыбыраҡ уйланып ултыра. Уның янында бәләкәй малайҙар әйләнә, ҡайһы берҙәре гармонсының иғтибарһыҙыраҡ сағында баяндың һөйәктән эшләнгән телдәрен ҡулдары менән һыйпап китәләр.

— Эй, Фәйзүк, нәмә, иңәһе күкәй һалырға ингән ата ҡаҙ һымаҡ, ултыраһың, тарт, әйҙә,—ти бер егет.

Шул һүҙҙән һуң Фәйзүктең муйыны баяндың уң яғына табан ҡыйшая һәм ул, һул аяғын иҙәнгә ныҡ баҫып, баянды тартып ебәрә. Залға икенсе бер йәнлелек инә. Йәштәр бейергә ҡуҙғалмайҙар. Солтан был тартыныуҙы һиҙә лә библиотека яғына инеп китә. Уның библиотекә ишеген асып инеүе була, бығаса шаулап китергә ҡыймай торған йәштәр ҡапыл гөрләй башлай. «Нишләйһең, хөрмәттең бер төрө» тип ҡуя Солтан эстән генә. Иғтибарһыҙ ғына газета аҡтарырға керешә.

Йәштәр клубтан тарала башлағанда төн уртаһы еткәйне. Төн болотло һәм ҡараңғы. Аяҡ аҫты бөгөн дә туңмаған. Ҡыйыҡ баштарында төрлө ярыҡтарға эләгеп ҡалған һуңғы ҡарҙарҙың, аҙаҡҡы тамсылары тамалар. Ер өҫтөнән, ҡарҙан әрселгән урындарҙан, дымлы тупраҡ еҫе бөркөлә. Һағындырған һәм көтөп алынған еҫ был.

Хәтирә иптәш ҡыҙҙары менән клуб алдына сыҡҡас та, ҡапыл береүһенең беләгенән ҡыҫып алды ла, туҡтаны:

— Тыңлағыҙ әле!

— Эйе.

Бөтәһе лә төн тынлығынан гауыш эҙләп ҡолаҡ һалдылар. Берберһе артлы тамған һирәк кенә тамсы тауыштары араһынан ниндәйҙер өҙөк-өҙөк шатырҙау тауышы ишетелә.

— Боҙ ҡуҙғала бит!

Йәштәр тағы ла иғтибар менән тыңларға керешәләр. Ниҙер ишетелгән дә, ишетелмәгән дә кеүек. Бер нәмәгә лә оҡшатып булмаған был тауыш, әле бик алыҫта, әле бик яҡында кеүек, сағылып ҡала. Башҡалар менән бергә Гөлнур ҙа шәлен асыбыраҡ һаҡ ҡына тыңлап торҙо ла:

— Юҡ ла, клубта Йыһан апай скамьяларҙы күсерә, — тине.

Бөтәһе берҙән, тип әйтерлек, көлөп ебәрҙеләр.

— Шулай шул.

Хәтирәнең бик күптән йөрөткән уйҙары ошо урында күкрәгенән тышҡа бәреп сыҡтылар, һәм ул, үҙ алдына һөйләнгән һымаҡ, башлап алды ла китте:

— Шулай шул. Беҙ хәҙер яҙҙың кескәй генә бер билдәһен дә һиҫкәнеп, дәртләнеп ҡаршы алабыҙ. Бөгөн дә аяҡ аҫты туңмаған — был яҙҙың уртаға килеп кереүе. Бөгөн ҡояш тағы ла тулыраҡ ҡарар.

— Шиғыр һөйләй тиһәң, рифмаһы юҡ, — тине Гөлнур, ләкин көлмәне. Шунда уҡ Хәтирәне бүлдереүенә үкенде. Хәтирә уға ҡарап һүҙен өҙмәне, шул уҡ тауыш менән ялғап китте:

— Колхоз йыйылышында беҙ үҙ һүҙебеҙҙе әйтербеҙ. Уныһына ныҡлап әҙерләнеп барырбыҙ. Мин әле ошонда бер һүҙ әйткем килә. Беҙ үҙған йыл аҙ булдыҡ. Колхозда тик бер звено алдынғы булып сыҡты. Күберәк булала инек бит. Әйе бит? Бөтә колхоз менән! Бына үҙе лә, исмаһам, күңелле буласаҡ. Үҙ кеше уңышҡа ирешкәндә, нишә йөҙ кеше, йөҙ илле, ике йөҙ, өс йөҙ кеше ирешмәй? Һуғышта шулай булған бит. Алдынғылар баштыларҙы рухландырғандар. Быныһын юлын беҙ табырбыҙ. Кәрәк булһа бөтә ергә таралырбыҙ.

Хәтирәнең был һүҙҙәре өйләнеп торған ҡыҙҙар төркөмөн митингыға әйләндереп ебәрҙе.

—Шулай итәбеҙ!

— Йыйылышта ла шулай һөйләйбеҙ.

— Унда әҙерләнеп барабыҙ. Шуберәк итеп һөйләрбеҙ.

Гөлнур тиҙ генә ҡыҙҙарҙы туҡтатты:

Туҡтағыҙ әле?

— Ни бар?

— Боҙ, ҡуҙғала, ишетәһегеҙме боҙ ҡуҙғала!

Ҡыҙҙар ҡолаҡтарын ғына түгел, күҙ алмаларын да ҡуҙғатмай, керпектәрен лә ҡаҡмай тыңлайҙар.

— Боҙ ҡуҙғала! Был скамья түгел, ысынлап та боҙ. Ҡуҙғала, шатырҙай.

Ысынлап та боҙ ҡуҙғала һәм был икенсе ташҡындың күтәрелеүе ине.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре 2—72—26

П 00733. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х. — 1 Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 90 7 май йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында. (1-се бит).
Сәсеүҙә һәр бер сәғәт ваҡыт ҡәҙерле. Баҫыу эштәрен юғары темп менән алып барырға! (1-се бит).
Большевистик Матбуғат көнө. Мәскәүҙә матбуғат работниктәренең дөйөм йыйылышы. (1-се бит).
Л. Ғәҙелов. — Башҡортостанда радио. (2-се бит).
М. Арбузов. — Радио көнө. (2-се бит).
Стена газеталары биттәренән. (2-се бит).
Мәскәүҙә 1948 йыл Беренсе Майҙы байрам итеү. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Левтан. — Тимер юл транспортында партия етәкселеген көсәйтергә. (3-сө бит).
С. Мәүлитов. — Орденле слесарь Алексей Гончаров. (3-сө бит).
Заемға яҙылыуҙа республикабыҙ хеҙмәтсәндәренең яңы еңеүҙәре. (3-сө бит).
Х. Тенишев. — «Урман аҫылын» ойошҡан рәүештә үткәреү. (3-сө бит).
Ғ. Ҡотлобаев. — Культура-ағартыу учреждениеларына иғтибарҙы көсәйтергә. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәрергә

Яҙғы сәсеү фронты киңәйә. Яңынан яңы колхоздар, МТС-тар, совхоздар сәсеүгә төшәләр. Башҡортостандың төньяҡ райондарында ла, көнсығыш һәм көнбайыш райондарында ла баҫыу эштәре йәйелә. Ауырғазы, Әлшәй, Стәрлетамаҡ, Благовар, Бүздәк, Пәрмәкәй, Ҡандра, Дәүләкән, Шишмә һәм Өфө райондары ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыу планын арттырып үтәнеләр. Был сараларҙы һәм баҫыу эштәренең бөтә төрҙәрен үҙ ваҡытында башҡарыу өсөн хәҙер һәр бер колхозда шарттар тыуҙы.

Партиябыҙҙың һәм хөкүмәтебеҙҙең колхоз крәҫтиәндәре тураһындағы хәстәрлеге менән рухланған Башҡортостан игенселәре ауыл хужалығын күтәреү буйынса быйыл тағы ла юғарыраҡ йөкләмәләр алдылар. Бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 10,5—12-шәр центнер урожай алырға һүҙ бирелде. Был яуаплы бурысты уңышлы үтәү өсөн яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү талап ителә.

Баҫыу эштәренең ҡыҫҡа сроктары өсөн көрәш быйыл тағы бер бик мөһим шарт менән билдәләнә: ғәҙәттәгегә ҡарағанда яҙ һуңлап килде. Сәсеүлектәргә үҫергә кәрәкле булған ваҡытын тәьмин итеү, ерҙә күберәк дым һаҡлап ҡалыу өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш. Был сараларҙың иң мөһиме — баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта үткәреү. Колхоздарҙағы, МТС-тарҙағы бөтә көстө, машина-трактор паркын баҫыуға күсерергә һәм уларҙы тулы нагрузка менән файҙаланырға кәрәк. Иртә культуралар сәсеүҙе 2—3 көнгә һуңлатыу ҙа һәр гектарҙан урожайҙы 3—4 центнергә кәметеүен иҫтән сығарырға ярамай.

Ҡыҫҡа срок — юғары урожай өсөн көрәштә мөһим фактор. Шуға ҡарамаҫтан, күп кенә урындарҙа уның менән иҫәпләшмәйҙәр, яҙғы сәсеүҙе йәйелдереүҙә ҡуҙғала алмаусылыҡ күрһәтәләр. Ҡыйғы районының «Һабансы», «8 март» колхоздарында өлгөргән участкаларҙың байтаҡ булыуына ҡарамаҫтан, тотош массивтарҙың кибеүен көтәләр. Һөрөү ҙә, тырматыу ҙа, сәсеү ҙә алып барылмай. Абдрәзәк МТС-ының тракторҙары әле булһа баҫыуға сыҡмағандар. Шундай уҡ сигналдар башҡа күп кенә урындарҙан да килә. Улар бөтәһе лә колхоз етәкселәренең, партия, совет ойошмаларының быйылғы яҙҙың үҙенсәлеге менән иҫәпләшмәүҙәрен, баҫыу эштәрен йәйелдереүҙә бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәклеген баһаламауҙарын күрһәтәләр.

Яҙғы сәсеүҙе йәйелдереүҙә һуңлау менән бер рәттән, баҫыу эштәренең сифатына ла күп кенә урындарҙа иғтибар бирелмәй. Һаман әйтелгән ҡыуып, ҡайһы бер колхоз етәкселәре яҙғы сәсеүҙең агротехникаһын тупаҫ рәүештә боҙалар. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районының «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозында төрлө ниғеҙһеҙ сәбәптәргә һылтанып, иртә культураларҙы ҡул менән сәсеүгә юл ҡуйылған. Агротехника талаптарын һанға һуҡмау ваҡиғалары Әлшәй районы колхоздарында ла күп осрай. «Яңы Сапан» ауыл хужалығы артелендә ерҙе ремонтланмаған, көйләнмәгән һабандар менән 6—8 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрәләр. Таналы МТС-ының ҡайһы бер трактор бригадалары ла колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәмәйҙәр, ерҙе иң бары 10—16 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрәләр. Был сигналдар баҫыу эштәренең сифатына иғтибар бирелмәүе, брак менән эшләүселәргә ҡаршы көрәштең йәйелдерелмәүе тураһында һөйләйҙәр.

Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ урындағы работниктәрҙән игенселектең культураһын күтәреү һәм баҫыуҙарҙың урожайлылығын арттырыу мәсьәләләре менән серьез рәүештә шөғөлләнеүҙе талап итәләр. Яҙғы сәсеү ваҡытында юғары урожай өсөн көрәшеү — ул алдынғы агротехниканы тормошҡа ашырыу, баҫыу эштәренең ҡыҫҡа срогын тәьмин итеү, ерҙе сифатлы эшкәртеү, яҡшы орлоҡтар сәсеү тигән һүҙ. Был талаптарҙы еренә еткереү өсөн һәр бер звенола, бригадала, колхозда, МТС-та көрәш ойошторорға кәрәк.

Хәҙер төп иғтибарҙы иртә культураларҙы, иң беренсе нәүбәттә яҙғы бойҙайҙы яҡшы сәсеп ҡалдырыуға йүнәлдерелгән булырға тейеш. Бойҙай — иң ҡиммәтле культура, ул быйыл беҙҙең республикабыҙҙа һабан ашлыҡ майҙанының яртыһын тәшкил итә. Шул уҡ ваҡытта бойҙай — талапсан культура. Иртә срок, тунға һөрөлгән, яҡшы эшкәртелгән ер уға бирелергә тейеш. Бойҙай сәсеүҙе бөтә саралар менән тиҙләтеү менән бер рәттән, иртә культураларҙан күп йыллыҡ үлән, көнбағыш, һоло сәсеүҙең темпын да ныҡлы күтәрергә кәрәк.

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү — бөтә колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың, ауыл хужалығы специалистәренең яуаплы бурысы. Баҫыу эштәренең сифатын тәьмин итеүҙә агрономдарға айырыуса ҙур вазифа йөкмәтелә. Үкенескә ҡаршы, ҡайһы бер агрономдар был яуаплы вазифаларҙы үтәүҙә һалҡынлыҡ күрһәтәләр һәм алдынғы агротехника талаптарын еренә еткереүҙе талап итмәйҙәр. Юл ҡуйылмаҫ эш. Артабан быға түҙеп торорға мөмкин түгел. Һис кисекмәҫтән район ауыл хужалығы бүлектәренең, МТС-тарҙың бөтә агрономдары сталинсә яңы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы яҙғы сәсеүен һәр яҡлап — темп яғынан да, сифат яғынан да уңышлы үткәреү өсөн эштәрен үҙгәртеп ҡорорға, юғары урожай өсөн көрәштең башында булырға тейештәр.

Башҡортостан игенселәре 1948 йылда ауыл хужалығының артабан күтәрелешен тәьмин итеү өсөн Чиләбе өлкәһе игенселәре менән социалистик ярышҡа сыҡтылар.

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы яҙғы сәсеүҙә еңеп сығыусы райондар, МТС-тар, совхоздар өсөн күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар һәм аҡсалата премиялар билдәләнеләр. Урындағы партия, совет ойошмалары социалистик ярышты киң йәйелдерергә һәм бөтә игенселәрҙе яҙғы сәсеүҙе еңеүле рәүештә тамамлау өсөн көрәшкә туплырға бурыслылар.

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы работниктәре! Баҫыу эштәренең юғары сифатын тәьмин итегеҙ, иртә культураларҙы тиҙерәк сәсеп бөтөрөү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланығыҙ! Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреп, 1948 йыл урожайының ышаныслы нигеҙен һалығыҙ!

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

ЯҘҒЫ СӘСЕҮҘӘ СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШТА ЕҢЕП СЫҒЫУСЫ РАЙОНДАР, МТС ҺӘМ СОВХОЗДАР ӨСӨН КҮСМӘ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ БУЛДЫРЫУ ТУРАҺЫНДА

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы 1948 йылда яҙғы сәсеүҙе өлгөлө үткәреү өсөн райондар, колхоздар, МТС һәм совхоздар араһында социалистик ярышты киң йәйелдереү маҡсатында ярышта еңеүселәргә БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарын һәм аҡсалата премияларын булдырырға ҡарар иттеләр.

Ярышта еңеүсе райондар өсөн: бер күсмә Ҡыҙыл Байраҡ һәм 10-ар мең һумлыҡ беренсе өс премия, биш мең һумлыҡ икенсе өс премия;

МТС-тар өсөн: бер күсмә Ҡыҙыл Байраҡ һәм 5 мең һумлыҡ аҡсалата бер премия;

Совхоздар өсөн: бер күсмә Ҡыҙыл Байраҡ һәм 5 мең һумлыҡ аҡсалата бер премия.

Күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарҙы районларға 5 көнлөк, МТС-тарға 10 көнлөк, совхоздарға 5 көнлөк эш йомғаҡтары буйынса бирергә.

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы район Советы исполкомдарына һәм ВКП(б) райкомдарына яҙғы сәсеүҙе үткәреү буйынса алдынғы колхоздарҙы һәм трактор бригадаларын бүләкләү өсөн район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтарын булдырырға тәҡдим итте.

Сәсеүҙә һәр бер сәғәт ваҡыт ҡәҙерле
Баҫыу эштәрен юғары темп менән алып барырға!

Яҙғы сәсеү фронты киңәйә

УСАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Райондың бөтә колхоздарында ла баҫыу эштәре башланды. Бер нисә көн эсендә генә 1000 гектар ер һөрөлдө һәм 200 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде.

«Ҡыҙыл партизан» колхозы члендәре районда беренсе булып иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар. Был колхозда 4 трактор бригадаһы, 8 баҫыусылыҡ бригадалары эшләй. Тәүге ике көндә генә улар 100 гектарҙан артыҡ майҙанда ашлыҡ сәстеләр.

Райондың алдынғы «Новый путь», «Яңылыҡ», «Шишмә» колхоздарында ла баҫыу эштәре ҙур ойошҡанлыҡ менән бара. «Ҡарағас туба» колхозында тәүге 40 гектар бойҙай сәселде.

М. Хәйҙәров.

СТӘРЛЕБАШ. (Телеграф аша). СССР Верховный Советы Президиумының 24 апрель Указы менән рухланған колхозсылар юғары урожай үҫтереү өсөн көрәште киң йәйелдерәләр. Район колхоздарында бер нисә көн эсендә 360 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәре аҙыҡландырылды. 100 гектарҙан артыҡ майҙанда ер һөрелде.

Колхоздар-ара ярышта «Октябрь» һәм Матросов исемендәге ауыл хужалығы артелдәре алда баралар. Был колхоздарҙа Нуктулова, Макарова һәм Ивашенко иптәштәр етәкселек иткән звенолар ужымдарҙы тәрбиәләүҙә айырыуса яҡшы ойошторолғандар. Нуктулова звеноһы 10 һәм Ивашенко звеноһы 8 гектар ужым аҙыҡландырҙылар. «Социализм», «Ҡыҙыл юл» колхоздарының һабансылары 20-шәр гектар ер һөрҙөләр.

Колхоз баҫыуҙарында хәҙер ҡыҙыу рәүештә иртә культуралар сәсеү эштәре бара.

Б. Нуриманов.

Баҫыу эштәре башлаусы колхоздар һаны көндән-көн арта

АРХАНГЕЛЬ. (Телефон аша). Баҫыу эштәрен башлаусы колхоздар һаны көндән-көн арта бара.

«Память Кирова» колхозында бер көн эсендә 20 гектар майҙанда һоло сәселде. Ворошилов исемендәге колхозда ла һөрөү һәм сәсеү эштәре бара. Был колхозда 3 майҙа 8 гектар арпа сәселде.

Ғафури исемендәге колхоз баҫыу эштәрен 1 майға тиклем уҡ башланы, ужым сәсеүлектәрен аҙыҡландырыу үткәрелде, хәҙер ҡыҙыу темп менән иртә культуралар сәселә.

4 майҙа яңынан 7 колхоз баҫыуға сыҡты. Архангель МТС-ы тракторҙары ла шулай уҡ ер һөрөү эштәрен башланылар.

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш В. С. Солонин звеноһы баҫыуҙа

БАЙМАҠ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективы үҙған йыл 26 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 33,8-әр центнер бойҙай урожайы алыусы алдынғы звеновод Василий Степанович Солониңә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһындағы СССР Верховный Советы Президиумының Указын ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланы.

Ошо айҡанлы совхозда митинг үткәрелде. Митингыла сығыш яһаусы совхоз директоры Симонов, партия ойошмаһы секретаре Дмитриев, рабочком председателе Васильев иптәштәр һәм совхоздың стахановсылары Социалистик Хеҙмәт Геройы звеновод иптәш Солониндең юғары урожай өсөн иҫкәк арымай-талмай көрәшеүе тураһында һөйләнеләр.

— Еңеү ул үҙенән-үҙе генә килмәй. Уның өсөн күп хеҙмәт, энергия һалырға, күп ауырлыҡтарҙы еңергә кәрәк. Беҙҙең бурыс — Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Солонин өлгөһөндә бөтә бүлексәләрҙең һәм звеноларҙың да юғары урожай алыуҙарын тәьмин итеүҙән тора, — тинеләр улар үҙҙәренең сығыштарында.

Һуңғы һүҙҙе Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Солонин алды.

— Баҫы тик беҙҙең илдә генә ябай кешеләрҙең намыҫлы хеҙмәтенә юғары баһа бирелә. Быйыл өсөн мин партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙгә ысын күңелдән рәхмәт белдерәм. Был наградаға яуап итеп, үҙ звеном менән быйыл 250 гектар майҙанда арыштың һәм 40 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан кәмендә 30-ар центнер урожай алырға һүҙ бирәм, — тине.

Хәҙер совхозда ҡыҙыу темп менән баҫыу эштәре бара. 5 майға бөтәһе 500 гектар ер һөрелде, 1200 гектар тырматылды һәм 250 гектар майҙанда культивация үткәрелде.

Иптәш Солонин звеноһы члендәре ҙур күтәренкелек һәм дарт менән эшләйҙәр. Был звеноның тракторисы иптәш Носков көн һайын 25-әр гектар ер һөрә. Трактористтәрҙән Лаушкин һәм Кулачев иптәштәр ҙә смена заданиеһын арттырып үтәйҙәр.

И. Зарипов.

Бүздәктә аҡрын ҡуҙғалалар

Районда баҫыуҙар тотош массивтарҙа өлгөрҙө. Алдынғы колхоздар бер нисә көн инде яҙғы сәсеүҙе массовый рәүештә алып баралар. Тимирязев исемендәге колхоз Май байрамы көндәрен ныҡышмалы хеҙмәт менән үткәрҙе. Был артелдең члендәре 2 майға 135 гектар ер тырматтылар, 30 гектар культивацияланылар. 2 майҙа 30 гектар бойҙай сәстеләр. Бында 30 гектар бойҙай сәстеләр. Был төбәкендә хеҙмәт ярамлылығы юғары. Мәҫәлән, һабансылар—Богомазов, Даянкин һәм башҡа иптәштәр көндәлек заданиеһе 130 процентҡа еткереп үтәйҙәр. Эш сифаты ла яҡшы. «Чатра», «Нур», «Урта юл», «Ҡуш терәк» колхоздары яҙғы сәсеү эштәрен киң йәйелдерҙеләр һәм иртә культураларҙы 8—9 көндә сәсеү өсөн бөтә сараларҙы күрәләр.

Ләкин әле Бүздәк районының күпселек колхоздары баҫыу эштәренә һуңлап тотоналар. Баҫыуҙа ҡуна ятып эшләү ойошторолмаған. Бына «Ҡөс» колхозы. Бында 1 һәм 2 майҙа һабансылар, тырмасылар эшкә сыҡтылар. Ләкин бөтә бригадалар ҙа ла эш ваҡыты 5 — 6 сәғәт кенә дауам итте. Колхоз етәкселәре баҫыуҙарҙа ҡуна ятып эшләүҙе ойошторою өсөн «көндән йылына биреүен» көтәләр. «Ҡөс» колхозы районда сәсеү майҙаны ҙур булған артелдәрҙең береһе. Ул быйыл 800 гектар майҙанды яҙ һөрөп сәсергә тейеш. Ләкин эш бик һуңлап бара. Ә район етәкселәре яҙғы сәсеү эштәренең юғары темпта һәм сифатлы итеп башҡарылыуын тәьмин итеү өсөн саралар күрмәйҙәр.

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа үткәреү өлкәһендә МТС-тарға яуаплы бурыстар йөкмәтелгән. Ә улар яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәрендә ҡуҙғала алмаусанлыҡ күрһәттеләр. Күҙәй МТС-ы директоры иптәш Сәетов ябыулыҡҡа артыҡ расход «сығыуҙан ҡурҡып», һабандың биш төрәлен генә файҙаланып һөрә башлаған «Октябрь» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Байков бригадаһын эшен туҡтатты һәм район етәкселәренә «ер туң әле, һөрөп булмай» тигән ялған информация бирҙе. МТС-ҡа насар ремонтланған тракторҙарҙың тәүге бураҙналарҙа уҡ ватылыуҙары тураһында хәбәрҙәр килә. Ремонт ваҡытында сифат өсөн көрәшмәгән МТС етәкселәре, хәҙер ҙә трактор паркын тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн саралар күрмәйҙәр.

Бүздәк районы игенселәре алдында яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү буйынса яуаплы бурыстар тора. Күҙҙән һөрөп ҡалдырылған майҙандарҙың аҙ булыуы һәм яҙҙың һуңлап килеүе яҙғы баҫыу эштәренең темпын бик ныҡ күтәреүҙе талап итә. Тәүге көндәрҙең етешһеҙлектәрен шунда бөтөрөргә кәрәк.

М. Кәримов.

Эш насар ойошторолған

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ. (Телефон аша). «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозында сәсеүҙе тиҙ һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Эшсе һәм тартыу көстәре, шулай уҡ ауыл хужалығы машиналары ла етерлек.

Ләкин колхоз председателе иптәш Ғәйнетдинов был мөмкинлектәрҙе дөрөҫ файҙаланмай. Сәскестәр етерлек булыуға ҡарамаҫтан, ул «ер дымлы» тигән һылтау менән 3 гектар һолоно ҡул менән сәстереп, агротехниканы тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйҙы.

Һабансылар, тырмасылар араһында индивидуаль сдельщина ҡулланылмай. Һабансылар ҙа, тырмасылар ҙа бөтәһе лә бер урында тырматалар, һөрәләр. Шуға күрә кемдең нисек эшләүе, норманы үтәүе, йәки үтәмәүе билдәле түгел. Яҡшы эшләүсегә лә, насар эшләүсегә лә бер төрлө хеҙмәт көнө яҙыла.

Ҡырмыҫҡалы МТС-ында ла ҙур етешһеҙлектәр бар. МТС директоры иптәш Ҡадиров тракторҙар өсөн билдәләнгән маршрутты һанға һуҡмай. Иптәш Әхмәтьянов етәкселек иткән трактор бригадаһы тәүге биш көнлөктә «Комбайн» колхозында эшләргә тейеш ине. Бында ер ҙә күптән өлгөргән. Ә трактор бригадаһы МТС директорының ҡушыуы буйынса бер аҙнанан бирле инде «Красный ключ» колхозында ерҙең кибеүен көтөп эшһеҙ ултыра.

Ҡарламан МТС-ының күп кенә трактор бригадалары тағылма инвентарҙар менән әле булһа тәьмин ителмәгәндәр. Был хәл эшкә ҙур тотҡарлыҡ яһай. Мәҫәлән, Каганович исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе трактор бригадаһы, һабан булмағанлыҡтан дүрт көн буйына инде тик ултыра. Һабандың ҡайҙа булыуын трактор бригадаһы бригадиры иптәш Хәйретдинов та, шулай уҡ МТС етәкселәре лә белмәйҙәр һәм уны тиҙерәк табыу сараһын күрмәйҙәр.

М. Ғимадиев.

Звено юғары урожай өсөн көрәшә

Хәйбулла районы «Киң туғай» колхозында орлоҡ участкаһы звеноһында 9 кеше эшләй. Уларҙың бөтәһе лә йәштәр, комсомолецтар. Звеновод иптәш Әделгәрәй Ҡыуандыҡовтың тырышлығы арҡаһында звенола эш яҡшы ойошторолған. Звено члендәре бөтәһе лә баҫыуҙа үҙ-ара ярышып эшләйҙәр.

Звено быйыл 66 гектарҙа эшлек сәсә, 3 майға был майҙандың инде 15 проценты сәселде. Сәсеүҙе ерҙә, трактор сәскесе менән аркылы-буй итеп, яровойлаштырылған орлоҡ менән үткәрелә.

Звеноның 9 гектар ужымы ла бар. Был сәсеүлектәр көл менән аҙыҡландырылдылар һәм тырматыу үткәрелде.

Ш. Юлдашбаева.

Большевистик Матбуғат көнө

Мәскәүҙә матбуғат работниктәренең дөйөм йыйылышы

5 майҙа Союздар Йортоноң Колонна залында газета, журналлар, издательстволар, полиграфия предприятиелары работниктәренең һәм хәбәрселәр активының большевистик Матбуғат көнөнә арналған дөйөм йыйылышы булды.

Йыйылыш президиумында **М. А. Суслов, Б. Н. Черноусов, И. А. Парфенов, П. Н. Поспелов, Д. Т. Шепилов, Н. А. Михайлов, К. А. Мерецков, Н. П. Фирюбин, Н. И. Данилов, К. А. Губин, И. Я. Фомиченко, С. А. Жолинн, М. И. Малахов, О. В. Козлова, И. В. Шикин, Н. Г. Пальгунов, А. Я. Блатин, И. В. Саутин, Н. А. Куликов** иптәштәр һәм башҡалар бар.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының пропаганда һәм агитация Управлениеһы начальнигының урынбаҫары иптәш **Д. Ф. Ильичев** большевистик Матбуғат көнө тураһында доклад менән сығыш яһаны.

Үҙенең докладында иптәш Ильичев В. И. Ленин һәм И. В. Сталин тарафынан тыуҙырылған большевистик матбуғаттың беҙҙең Тыуған илебеҙ халыҡтарының революцион көрәшендә ҙур роль уйнағанлығын билдәләне. «Матбуғат, — тип өйрәтә иптәш Сталин, — уның ярҙамында партия көн һайын, сәғәт һайын эшселәр синыфы менән үҙенә кәрәкле телдә һөйләшә торған берҙән бер ҡорал. Партия һәм синыф араһында рухани ептәрҙе һуҙырлыҡ башҡаса средстволар, башҡаса һығылмалы аппарат тәбиғәттә юҡ».

Беҙҙең матбуғатыбыҙҙың бөтә юлы фәҡәт социализм яҡтыһы менән яҡтыртылған һәм тап шуға күрә лә ул үҙенең коллектив пропагандист, агитатор һәм ойоштороусы булыу ролен уңышлы рәүештә үтәй. Беҙҙең матбуғатыбыҙҙың нигеҙендә уның үҙенсәлектәре, массовый характеры, дөрөҫлөгө һәм халыҡсыл булыуы һалынған.

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү, кешеләр аңында капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәшеү эшендә совет матбуғаты алдында ҙур бурыстар тора.

Иптәш Ильичев, большевистик партия киң хеҙмәтсәндәр массалары араһында идеологик эште күтәреүгә бик ҙур әһәмиәт бирә, тип айырыуса билдәләй. Совет журналистәре коммунизмдың бөйөк идеяларын пропагандалау беҙҙең матбуғатыбыҙҙың иҙгә эше булып торғанлығын хәтерҙәрендә тоторға тейештәр.

Докладта бик ҙур урын һуғышта һуңғы сталинсә биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәштә бөтә халыҡ социалистик ярышын ойоштороу һәм үҫтереү эшендә матбуғаттың бурыстарына арналды.

Промышленноста, ауыл хужалығында алдынғы кешеләрҙең яңы, гүзәл плеядаһы үҫеп сыҡты. Беҙҙең матбуғатыбыҙ промышленноста һәм ауыл хужалығында халыҡтың ижади инициативаһын, алдынғыларҙың һәм новаторҙарҙың ҡиммәтле тәжрибәләрен төрлө саралар менән пропагандаларға һәм киң рәүештә таратырға тейеш. Хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү, яңы техниканы, ҡаты экономия режимын индереү, предприятиеларҙың рентабеллегә өсөн көрәш мәсьәләләре беҙҙең матбуғатыбыҙҙың биттәренән төшмәҫкә тейеш түгелдәр.

Докладсы, большевистик матбуғат арсеналында тәнҡит бүленмәй торған һәм даими рәүештә хәрәкәт итә торған ҡорал булып торорға тейеш, тип айырыуса билдәләне. Большевистик матбуғат работниктәренә, тине һәҙәмталәү һүҙе итеп Д. Ф. Ильичев, партия коммунизм төҙөү өсөн бөтә халыҡ көрәшенең иң яуаплы боевой участкаларының береһен ышанып тапшырҙы. Бөйөк Ленин—Сталин партияһына, беҙҙең героик совет халҡыбыҙға хеҙмәт итеүгә үҙебеҙҙең бөтә көстәребеҙҙе, белемдәребеҙҙе һәм тәжрибәбеҙҙе бирәйек.

Йыйылышта ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән иптәш И. В. Сталинға ҡотлау хаты ҡабул иттеләр. (ТАСС).

Башкортостанда радио

Бөгөн беҙҙең илебеҙ Радио көнөн билдәләп үтә. 1895 йылда рус ғалиме Александр Степанович Попов үҙе уйлап сығарған радиоприемникте рус физика-химия обществоһы ултырышында эшләтеп күрһәтте. Бына шул йыл кеше фекеренең иң бөйөк ҡаҙаныштарынан береһе булған радионың тыуыу йылы булып әүерелде. Шулай итеп, радионың тыуған ере булып кинйә лә булһа башҡа ил түгел, ә беҙҙең Россия һанала һәм уны итальянлы Маркони түгел, ә беҙҙең бөйөк ватандашыбыҙ Попов ижат итте.

Россияла Бөйөк Октябрь революцияһынан һуң радионың алға китеүе Ленин һәм Сталин исемдәре менән айырылмаҫлыҡ рәүештә бәйләнгән. Халыҡҡа мөрәжәғәт итеп совет радио станциялары аша тапшырылған беренсе радиограммаларҙың авторҙары һәм редакторҙары Ленин һәм Сталин ине. 1917 йылдың 12 ноябрендә Ленин «Советтарҙың Бөтә Россия Съезы Совет хөкүмәтен төҙөүе» тураһында радио аша тапшырыласаҡ мөрәжәғәткә ҡул ҡуйҙы. Ә ул көндән, 22 ноябрҙә, рус армияһының ставкаһы һәм командующий Духонин Совнаркомдың приказын үтәүҙән баш тартҡас, Ленин был хыянатсыны урынынан алырға саҡырып һалдаттарға һәм матростарға радио аша мөрәжәғәт итте.

Лениндең 12 һәм 22 ноябрҙә радио аша тапшырған мөрәжәғәттәрен бөтә донъяла беренсе таҫҡыр радио тапшырыуҙың башланыуы тип ҡарарға мөмкин.

Илебеҙҙә радионы бөтә саралар менән үҫтереү эшенә иптәш Сталин ҙур иғтибар биреп килә. ВКП(б)-ның 15-се съезында яһаған докладында иптәш Сталин массаларҙың культура кимәлен күтәреүҙә радионың һәм киноның ролен айырыуса күрһәтеп үтте. ВКП(б)-ның 17-се съезында, ауылдағы социалистик төҙөлештең уңыштары тураһында һөйләгәндә, иптәш Сталин радионы был уңыштарҙың күрһәткестәренән береһе итеп билдәләне.

Илебеҙҙе индустриялаштырыуҙың сталинсе политикаһы радио промышленносе булдырыуҙы тәьмин итте. Радио станциялары төҙөү сталинсе биш йыллыҡтар осорондағы төҙөлештәрҙең әһәмиәтле бер өлөшө булып әүерелде. Илебеҙҙә радио аша бәйләнеш тотоу һәм радио тапшырыуҙың ҡеүәтле үҙәктәре төҙөлдө. Радио үҙәктәренең бөтә оборудованиеһы ла үҙ заводтарыбыҙҙа эшләнде. Ватан һуғышы башланыу алдынан Советтар Союзы радио станцияларының дөйөм ҡеүәте яғынан Европала беренсе урынды алып тора ине.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында радио информацияның алыштырғыһыҙ средствоһы булыу яғынан, шулай уҡ агитация һәм пропаганда средствоһы булыу яғынан бик ҙур роль уйнаны.

Радио илдең хужалыҡ һәм культура тормошонда массовый рәүештә ҡулланылып килә. Бәйләнеш тотоу өсөн файҙаланыуҙан тыш, ул һүрәттәрҙе алыҫ арағa тапшырыу (радиотелеграф, телевидение), самолеттарҙың, караптарҙың килеүен алыҫтан белеү (радиолокация), механизмдарҙы ситтән тороп идара итеү өсөн дә файҙаланыла. Радио шулай уҡ медицинала, металлургияла ла ҡулланыла.

Хәҙерге заман кешеһенең радионан башҡа тормошон күҙ алдына килтереү мөмкин түгел. Бына шуның өсөн дә беҙҙең илебеҙҙә радионы үҫтереүгә ҙур иғтибар бирелә.

Радио беҙҙең Тыуған илебеҙҙәге бөтә өлкәләрҙең һәм республикаларҙың, шул иҫәптән беҙҙең Башҡортостандың да байлығы булып әүерелде.

Партияның Өлкә Комитеты һәм Башҡортостан хөкүмәте республикабыҙҙы радиолаштырыу һәм радио тапшырыу эшенә сөрьеҙ әһәмиәт биреп килделәр. Сталинсе биш йыллыҡтар ваҡытында уҡ инде Башҡортостанда радиоуҙелдәр һәм лампалы радиоприемниктар селтәре төҙөлдө. Ҡалалар һәм промышленность үҙәктәре менән бергә ауылдар ҙа радиолаштырылды.

Репродуктор йәки радиоприемник булған өйҙә тормош тағы ла йәнләнә. Радионың ауылға инеүе йәштәр өсөн генә түгел, бәлки бөтә халыҡ өсөн ысын байрам була. Ул беҙҙең республикала формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураны үҫтереү эшендә ҙур роль уйнай.

Республикабыҙҙа радиолаштырыу эше йылдан-йыл киңәйә бара. Хәҙерге ваҡытта бөтә ҡалалар, район үҙәктәре һәм эшселәр поселкаларының күпселеге радиолаштырылған. Республикала 148 радиоуҙел бар, радиоточкаларҙың дөйөм һаны 83 меңдән арта, шул иҫәптән 27 мең радиоточка ауылдарҙа төҙөлгән. Бынан тыш 2.100 радиоприемник эшләй.

Хәҙер беҙҙә радиоуҙелдәр 105 ауыл Советын, 247 колхозды, 14 совхозды һәм 60 МТС-ты хеҙмәтләндерә. Бынан тыш 946 ауыл Советы, 67 МТС, 21 совхоз һәм 1389 колхоз радио тапшырыуҙарҙы телефон сымдары аша тыңлай.

Шулай ҙа республикабыҙҙы, бигерәк тә ауылды радиолаштырыу эше һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле.

Радиофикация темпын ныҡ көсәйтеү, булған уҙелдәрҙең, приемниктарҙың тотҡарһыҙ эшләүҙәрен тәьмин итеү, телефон сымдарын киң рәүештә файҙаланыу — радиофикация һәм радио тапшырыу работниктарының мөһим бурысы.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1943 йыл 3 июнь ҡарары районлдарҙа радио тапшырыуҙарҙы йәйеп ебәрергә мөмкинлек бирҙе. Был тарихи ҡарарға тиклем Башҡортостанда 16 район радио тапшырыу редакцияһы булһа, хәҙер район һәм ҡала редакцияларының һаны 40-ҡа етте.

Республика ауыл хужалығы эштәренең яуаплы осороно — яҙғы сәсеү осоронда инде. Хәҙер район радио тапшырыуҙың иң мөһим бурыстарынан береһе — ауыл хужалығы алдынғыларының тәжрибәһен киң рәүештә йәйелдереүҙән, юғары уңыш алыу өсөн, колхоздарҙа хеҙмәтте яҡшы ойоштороу, малсылыҡты үҫтереү өсөн көрәште ойоштороуҙан тора. Беҙҙең райондарҙағы радио тапшырыу редакцияларыбыҙ ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшеүсе ауыл хужалығы алдынғыларының сығыштарын йышыраҡ ойошторорға тейештәр.

Промышленность үҙәктәрендә радио тапшырыу работниктары предприятиеларҙың бөтә эшселәрен сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылы планын срогынан элек үтәү, производствоны рационализациялау, предприятиеларҙың рентабелле эшләүе өсөн, материалдарҙы һәм средстволарҙы экономия менән тотоу өсөн көрәшкә саҡырырға һәм ойошторорға бурыслылар.

Хәҙер радио тапшырыу һәм радиолаштырыу работниктарының бурысы совет кешеләрен политик һәм культура яғынан тәрбиәләү эшендә радионың ролен тағы ла юғарыраҡ күтәреүҙән тора. Радионы һәр бер эшсенең, хеҙмәткәрҙең һәм колхозсының байлығына әйләндерергә, ҡалаларҙы, эшселәр поселкаларын, ауылдарҙы, МТС-тарҙы, баҫыу стандарын радиолаштырыу эшен киңерәк йәйелдерергә кәрәк.

Радио — совет халҡына хеҙмәт итергә тейеш булған бөйөк көс, уның байлығы һәм ғорурлығы ул.

Л. Ғәҙилов,

БАССР Министрҙар Советы ҡарамағындағы республикан Радиокомитет председателе.

Стена газеталары биттәренән

Киң масса ҡатнашлығында

Черниковск машиналар төҙөү заводының начальнигы иптәш Михайлов булған цехтағы «Резец» стена газетаһының сығыуына быйыл 8 йыл тулды.

Газета социалистик ярышты киң йәйеп ебәреүҙә һәм бракҡа ҡаршы көрәштә цех етәкселәренә конкрет ярҙам итә.

1947 йыл цехта деталдәрҙе иҫәпкә алыу эштәре насар тора ине. Газета был етешһеҙлекте бөтөрөү өсөн систематик рәүештә оператив хәбәрҙәр, мәҡәләләр менән сығыштар яһаны. Иҫәп эштәрен боҙоусыларҙы фаш итте. Һөҙөмтәлә, цехтың был өлкәләге бөтөрөлдө.

Шулай уҡ, «Резец» газетаһы редколлегияһы бракҡарҙы бөтөрөүҙә лә ҙур ғына эштәр эшләне. Бракҡың сәбәптәре — деталдәрҙең номерҙарын бутап ебәреүҙә, — тип күрһәтте һәм бракҡа ҡаршы, төрлө карикатуралар менән, көн һайын «боевой листоктар» сығарҙы.

Цех хәҙер бракһыҙ эшләй. Март һәм апрель айҙары планын арттырып үтәне.

«Резец» стена газетаһы редколлегияһы массаға таянып эшләүгә ныҡ иғтибар итә. Бөгөнгө көндә уның актив яҙышыусыһы 80 хәбәрсеһе бар. 8 йылда уның 400 номере сыҡты. Газетаның теле үткер һәм оформлениеһы матур. Унда сыҡҡан һәр бер тәнҡит материал партия һәм профсоюз ойошмаларында тикшерелә, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн саралар күрелә бара. Бына шуның өсөн дә был газетаны эшселәр яратып уҡыйҙар һәм уға хәбәрҙәр яҙалар.

М. Мостафин.

Газета инициативаһы

Октябрьск ҡалаһының «Башкирский нефтяник» газетаһы редакцияһы ҡаланың партия, профсоюз, хужалыҡ ойошмалары менән берлектә «Стахановсылар кесәҙналы» үткәреп килә.

Был көндә предприятиеның стахановсылары, мастерҙары — нефтселәр, төҙөүселәр производствола үҙҙәренең нисек эшләүҙәре тураһында сығыштар яһайҙар, эштә тупланған тәжрибәләрен киң масса менән уртаҡлашалар.

Беренсе «кесәҙнала», йәш ҡаланың атаҡлы ташсыһы — айлыҡ планын систематик рәүештә 500 процентҡа еткереп үтәүсе иптәш И. Алтанец, икенсе «кесәҙнала» промыселдең өлкән операторы иптәш С. Һидиәтуллин, ә өсөнсө аҙнала, буровой мастер иптәш Я. Бочкарев сығыш яһаны.

Ҡаланың общественносе — бөтә төҙөүселәр, мастерҙар, инженерҙар, техниктар, стәкселе работниктар алдынғыларҙың сығыштарын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңлайҙар.

Редакция, алдынғы тәжрибәләрҙе популярлаштырыу маҡсатында — «Стахановсылар кесәҙнаһын» газетала яҡтырта бара.

Х. Маннан.

Мәскәүҙә 1948 йыл Беренсе Майҙы байрам итеү



Һүрәттә: Мәскәү гарнизоны ғәскәрҙәренең Ҡыҙыл Майҙанда парады. 1. СССР Ҡоралды Көстәре Министры Советтар Союзы Маршалы Н. А. Булганин Мәскәү гарнизоны ғәскәрҙәрен Беренсе Май байрамы менән ҡотлай. 2. Хәрби мәктәптәр курсанттары парадта. 3. Танкылар Ҡыҙыл Майҙанда.

Б. Пушкин, В. Савостьянов һәм В. Егоров фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы)

В. И. Ленин әҫәрҙәренең 17-се томы

ЛЕНИНГРАД. (ТАСС). «Печатный двор» типографияһы ВКП(б) Үҙәк Комитеты ҡарамағындағы Маркс—Энгельс—Ленин институты тарафынан В. И. Лениндең баҫырға әҙерләнгән әҫәрҙәренең дүртенсе баҫмаһының 17-се томын сығарҙы.

Был томға Лениндең 1910 йылдың декабренән алып 1912 йылдың апреленә тиклем осорҙа яҙылған әҫәрҙәре инде.

Томдың төп эстәлеге В. И. Лениндең партия өсөн көрәше, троцкийселәргә, ликвидаторҙарға һәм уларҙың ярҙамсыларына ҡаршы көрәше тураһындағы эштәренән тора.

Әҫәрҙәрҙең күбеһе меньшевиктарҙы партия сафынан ҡыуған һәм большевиктар партияһының үҙ аллына башлап ойошторған РСДРП-ның 1912 йылғы Прага конференцияһының әһәмиәтен сағылдыра.

Томда Лениндең «Марксизмдең тарихи үҫешенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре» тигән атаҡлы статьяһы баҫылды.

Өфөлә большевистик матбуғат көнө

5 майҙа Башгосфилармония залында Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәренең матбуғат работниктары менән берлектә большевистик Матбуғат көнөнә арналған тантаналы йыйылышы булып үтте.

Йыйылышта Матбуғат көнө тураһында доклад тыңланды. Доклад тан һуң йыйылышта ҡатнашыусылар көслө алҡыштар аҫтында халыҡтарҙың юлбашсыһы бөйөк Сталинға ҡотлау телеграммаһы ҡабул иттеләр.

Йыйылыштың тантаналы өлөшөнән һуң ҙур концерт бирелде. Концертта Башҡорт государство опера һәм балет театры солистары, Башгосфилармонияның халыҡ бейеүҙәре ансамбле һәм башҡа искусство мастерҙары ҡатнаштылар.

Радио көнө

Беҙҙең илебеҙ йыл һайын етенсе майҙа Радио көнөн билдәләй.

Кронштадта офицерҙар мәктәбендә физика уҡытыусыһы, бөйөк рус ғалиме Александр Степанович Попов 1895 йылдың 7 майында Петербургта рус физика-химия обществоһында үҙенең уйлап сығарыуы тураһында доклад менән сығыш яһаны һәм үҙе тарафынан уйлап сығарылған тимер сымһыҙ бәйләнеш аппаратын демонстрацияланы. 7 май кешелек донъяһында иң ҙур фәнни асыштарҙың бер көнө булып әүерелде.

А. С. Попов бөтә донъя ғалимдарынан беренсе булып радио бәйләнешенең идеяһын һәм уның төп принциптарын эшләү менән генә ҡалманы, бәлки шулай уҡ радиоприемник уйлап сығарҙы һәм бөтә донъяла беренсе радио тапшырыуҙы тормошҡа ашырҙы. «Фән, — тине иптәш Сталин, — үҙенең үҫешендә бер нәмәгә лә һәм һәр төрлө ҡомасаулыҡтарға ҡарамаҫтан иҫкене ватa һәм яңыны тыуҙыра ала торған күп батыр кешеләрҙе белә». Совет халҡы Поповты ошондай батыр кешеләр һанына индерә һәм ул быға хоҡуҡлы. Ул бөтә донъя фәне һәм техникаһы үҫешендә яңы гүзәл бит асты. Уның исеме үҙ ватанының данын арттырыусы гениаль рус ғалимдәре сафында тора.

Александр Степанович Попов үҙенең тыуған иленә тәрән бирелгән кеше ине. Сит ил эшлеклеләре уға үҙенең уйлап сығарғанын уларға һатырға йәки сит илгә күсергә тәҡдим яһап күп тапҡырҙар мөрәжәғәт иттеләр. Быға яуап итеп ғалим ғорурлыҡ менән былай тине: «Мин — рус кешеһе һәм үҙемдең бөтә белемдәремде, үҙемдең бөтә хеҙмәтемде, үҙемдең бөтә өлгәшеүҙәремде барыһын тик үҙемдең тыуған илемә генә бирергә хоҡуҡлымын... Мин рус кешеһе булып тыуыуыма ғорурланам. Әгәр ҙә минең тыуған илемә нисектер бирелгәнлегемде хәҙерге заман кешеләре аңламаһалар, бәлки беҙҙең киләсәк быуындарыбыҙ аңлар, һәм мин бәйләнештең яңы средствоһы сит илдә түгел, ә Россияла асылғанлығы менән нисек бәхетлемен».

Поповтың гениаль уйлап сығарыуынан һуң 50 йылдан аҙ ғына артығыраҡ ваҡыт үтте. Ошо ҡыҫҡа тарихи осор эсендә радио фәнендең һәм техниканың башҡа тармаҡтары белмәгән ҙур үҫешкә өлгәште. Хәҙерге заман радиоһы бәйләнеш өлкәһе менән генә һис тә сикләнеп ҡалмай. Ул ғәҙәттән тыш ҙур тиҙлек менән хәҙерге заман фәне, промышленность техникаһы һәм культураһының бик күп өлкәләренә үтеп инде. Радио физикала, геологияла, химияла, биологияла, медицинала, астрономияла уңышлы рәүештә ҡулланыла. Радиотехника производствоны автоматизациялау өсөн, алыҫтан тороп механизмдарҙың эше менән идара итеү өсөн уңышлы рәүештә файҙаланыла. Мәҫәлән, ҙур ҡеүәтле радио тулҡынының юғары йышлыҡ менән тирбәлеүҙәре металдарҙы иретеү һәм ҡорос изделиеләрен ҡыҙҙырыу өсөн, ағас материалдарын киптереү, изделиеләрҙе шымартыу өсөн, консерваларҙы стерилизациялау өсөн һәм хатта дауалауҙа физик методтарҙың береһе сифатында ла ҡулланыла. Радио авиацияла бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

Радиолокация хәҙерге заман радиотехникаһының иң һоҡланғыс өлгәшеүҙәренең береһе булып тора. Ул уңарлаған километрҙар алыҫлыҡтан тороп самолеттың, караптың, ярҙың ҡайҙа икәнлеген билдәләргә, бик уңайһыҙ шарттарҙа осорға һәм йөҙөргә мөмкинлек бирә.

Радио беҙҙең бөтә тормошобоҙҙоң үҫешенә бик ҙур йоғонто яһай. Беҙҙең быуатыбыҙҙы йыш ҡына радио быуаты тип юҡҡа ғына атамайҙар.

Радиотехника радио тапшырыуҙа бик тиҙ һәм массовый рәүештә ҡулланыла. Беҙҙең илебеҙҙә радиотехниканың һәм радио тапшырыуҙың үҫешенә һәр ваҡыт бик ҙур иғтибар бирелде һәм бирелә. Совет власы йылдарында радионың үҫеше Ленин һәм Сталин исемдәре менән бик ныҡ бәйләнгән. Улар революцияның тәүге көндәренән үк радионы киң рәүештә ҡулландылар. Ленин радионы бик мөһим гигант эш тип атаны. Иптәш Сталин радионың бик ҙур әһәмиәтле икәнлеген күп тапҡырҙар күрһәтте.

Сталинсе биш йыллыҡтар осоронда СССР-ҙа ҡеүәтле радио промышленносе тыуҙырылды. Был немец илбаҫарҙарына ҡаршы Бөйөк Ватан һуғышында радионы киң рәүештә файҙаланырға мөмкинлек бирҙе.

Һуғыштан һуңғы йылдарҙа радиотехника һәм радио тапшырыу яңынан үҫте. Ҡеүәтле радиостанцияларҙың киң селтәре төҙөлә, радиоприемниктар селтәре киңәйә. 1948 йылда халыҡ күп лампалы 600 меңгә яҡын радиоприемник аласаҡ. Детекторлы приемниктар эшләп сығарыу үҫә.

Радио тапшырыу һәм радио ҡабул итеү селтәренең үҫеүе халыҡтың культура һәм политик талаптарын хеҙмәтләндереүҙе байтаҡ киңәйтергә мөмкинлек бирҙе.

Ленин радионы «ҡағыҙһыҙ һәм араһыҙ» газета тип атаны. Радио арҡаһында, тине Ленин, «бөтә Россия Мәскәүҙә уҡыла торған газетаны тыңлаясаҡ». Радио шундай ысын массовый газета булып әүерелде, уны миллионлаған совет кешеләре тыңлай. Хәҙер Мәскәүҙән радио тапшырыу тәүлек буйынса өҙлөкһөҙ рәүештә тип әйтерлек һәм бер үк ваҡытта ос программа буйынса алып барыла. Мәскәүҙән көн һайын 20-нән артыҡ «Һуңғы яңылыҡтар» һәм үҙәк газеталарға күҙәтеүҙәр, политик һәм фәнни темаларға 10 — 12 беседа тапшырыла.

Радио бөтә донъя һәм Ватан музыкаһының, әҙәбиәтенең һәм драматургияһының иң яҡшы әҫәрҙәрен халыҡ массаларына еткерә һәм тайгала йәки далаларҙа юғалып ҡалған бәләкәй ауылдар менән ҙур үҙәктәрҙең культура кимәле араһындағы элекке айырманы бөтөрә. Мәскәү радио станциялары аша көн һайын 42 концерт, 6 әҙәби-драма тапшырыуы һәм балалар өсөн 8 тапшырыу яһала.

Шулай итеп радио үҙәк менән окраиналар араһындағы алыҫлыҡты бөтөрә, ҡала менән ауыл араһындағы бәйләнеште нығыта һәм ауылда йәшәүсе кешегә бөтә төп ваҡиғаларҙы башҡала халҡы менән бер үк ваҡытта белергә мөмкинлек бирә. Радио совет кешеһенең тормошона һәм көн-күрешенә инде.

Мәскәү тауышын шулай уҡ беҙҙең Тыуған илебеҙҙән ситтәге кешеләр ҙә тыңлайҙар. Сит илдәге радио тыңлаусылар өсөн радио тапшырыу көн һайын 32 төрлө сит телдә алып барыла. Совет радиоһы сит илдәге радио тыңлаусыларға большевистик хәҡиҡәт тауышын алып бара, уларға совет общественный ҡоролошоноң өҫөнлөктәре тураһында, демократияның тантанаһы, социалистик обществоның нигеҙҙәре тураһында һөйләй. Совет радиоһы — тыныслыҡтың һәм халыҡтар араһындағы дуҫлыҡтың өндәүсеһе булып тора.

Совет кешеләренең общественный-политик һәм культура кимәленең үҫеүе радио тапшырыуға ҡарата тағы ла юғарыраҡ талаптар тыуҙыра. Радио тапшырыуҙың бөтә работниктары радио тапшырыуҙарҙың сифатын яҡшыртыу тураһында ҡайғыртырға, беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәренең политик белемен күтәреү һәм культураһын һәр яҡлап үҫтереү өсөн радионың бөтә мөмкинлектәрен тулыһынса файҙаланыуға өлгәшергә тейештәр. Радио тапшырыу органдарының радио тыңлаусыларҙың киң массалары менән булған бәйләнешен нығытырға, уларҙың тәнҡитләүҙәрен, кәңәштәрен һәм теләктәрен иғтибарлы рәүештә өйрәнергә кәрәк.

«Радио, — тине М. И. Калинин, — үҙенең ҡоласы, үҙенең массовый булыуы яғынан пропаганда һәм агитацияның иң көслө средствоһы булып тора». Был средствоны тулыһынса файҙаланыу — радио комитеттарҙың һәм радио уҙелдарҙың бурысы ғына түгел, бәлки урындағы партия һәм совет органдарының да бурысы булып тора. Улар ҡайһы бер урындарҙа радио тапшырыуға тейешле иғтибарҙы биреп еткермәйҙәр. Радио тапшырыуҙың роле союзный һәм автономиялы республикаларҙа, милли райондарҙа бигерәк тә ҙур, бында ул рус телендә генә түгел, бәлки туған телдә лә алып барыла.

Государство радио ҡабул итеү селтәренең үҫешенә күп аҡса бүлә һәм мөмкин тиклем күберәк халыҡтың радио тыңлауына өлгәшергә тырыша.

Радиофикация пландарын үтәү һәм арттырып үтәү, радио трансляцион линияларҙың өҙлөкһөҙ эшләүҙәрен ойоштороу — былар бөтәһе лә связь Министерствоһы органдарының һәм радиофикация менән шөғөлләнеүсе башҡа ведомстволар органдарының ғына түгел, бәлки хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтарының да ныҡлы иғтибарын талап итә. Сауҙа органдары радио приемниктарҙы, радио лампаларын һәм запас өлөштәрҙе, бигерәк тә батарея менән туҡлана торған һәм ауыл ерҙәре өсөн билдәләнгән «Родина» радио приемниктарын һатыуҙы яҡшы ойошторорға тейештәр.

Беҙҙең илебеҙҙә радио техникаһын үҫтереүҙә радио һәүәҫкәрҙәрҙең роле бик ҙур. Фәндең бер генә өлкәһендә лә радио техникала булған кеүек ошондай массовый үҙэшмәкәрлек булғаны юҡ. Радио һәүәҫкәрҙәр халыҡ хужалығы өсөн квалификациялы радио специалистарын массовый рәүештә әҙерләүҙә ҙур роль уйнанылар һәм уйнайҙар. Радио һәүәҫкәрҙәр һанының артыуы, халыҡтың техник культураһын күтәреүгә, илде радиофикациялауға, радио техникаһының артабан прогресына ныҡ ярҙам итә. Радио һәүәҫкәрҙәргә төрлө саралар менән ярҙам күрһәтеү — партия, профсоюз һәм совет ойошмаларының мөһим бурысы ул.

Совет халҡы бөйөк Сталин етәкселегендә беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙҙең халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең гигант программаһын тормошҡа ашыра. Радио техника һәм радио тапшырыу работниктары был бөйөк бурысты үтәүгә үҙҙәренең бөтә көстәрен, белемдәрен һәм тәжрибәләрен бирәсәктәр.

М. Арбузов,

СССР Министрҙар Советы ҡарамағындағы радиофикация һәм радио тапшырыу буйынса Комитет председателенең урынбаҫары.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Тимер юл транспортына партия етәкселеген көсәйтергә

ВКП(б) Үҙәк Комитете бынан ес йыл элек тимер юл транспортында политбүлектәрҙе бөтөрөү тураһында сығарған ҡарарында территориаль партия ойошмалары алдына тимер юл бүлектәренең һәм магистралдәренең күп тармаҡлы эшенә көндәлек етәкселекте тәьмин итеү юлы менән тимер юлдың эшен яҡшыртыуға өлгәшеү бурыстарын ҡуйҙы.

Үҙәк Комитете тарафынан беҙҙең алға ҡуйылған был мөһим бурысты үтәүгә ВКП(б)-ның ҡала һәм район комитеттәре етерлек иғтибар биргән һәм тимер юл транспортына көндәлек ярҙам күрһәткән урындарҙа яҡшы уҡ һиҙгәй һөҙөмтәләргә өлгәшелде.

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитете Ишембай тимер юл станцияһының эшенә ҙур иғтибар бирә. Партияның ҡала комитете инициативаһы менән нефтте цистерналарға тултырыу эшен тиҙләтеү өсөн тимер юлсылар менән нефтселәр араһында социалистик ярыш ойошторолдо. Күптән түгел ВКП(б) ҡала комитете ошо ике коллективтең берләшкән кәңәшмәһен үткәрҙе һәм шунан һуң станцияның эшенә көндәлек контроль булдырҙы. Партияның ҡала комитете секретаре иптәш Джигутанов үҙе станцияла йыш ҡына була һәм транспорт эшселәре менән беседалар үткәрә. Ҡала комитете работниктәре станцияның партия ойошмаһына тимер юлсылар араһында массовый-политик эш ойоштороуҙа даими ярҙам күрһәтәләр.

Бындай ярҙам станцияның эшен яҡшыртыуға ныҡ тәьҫир итә. Ишембай тимер юлсылары ауыл хужалығы өсөн яғыулыҡ ташыу планын срогынан алда үтәнеләр. Улар 1947—1948 йылдарҙың бер нисә айы буйына бүлексәлә алдынғылыҡты үҙ ҡулдарында тотоп килеләр.

ВКП(б)-ның Октябрьск ҡала комитете Куйбышев тимер юлының хәл иткес станцияһы—Уруссу эшенә систематик рәүештә ярҙам итә. Партия ҡала комитетенең работниктәре станцияның эшен йыш ҡына тикшерәләр. ВКП(б) ҡала комитете тимер юлсыларҙың һәм нефтселәрҙең ныҡлы берҙәмлек менән эшләүҙәрең тәьмин итте, күп кенә ойоштороу саралары үткәреү, төнгө сменаларҙа эшләүселәр араһында массовый эште киңерәк рәүештә яҡшыртыуға, социалистик ярышты киң йәйелдереүгә өлгәште. Шул арҡала Уруссу станцияһы ғинуар айында ВЦСПС-тың һәм Юл эштәре Министрлығының беренсе премияһын һәм күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды.

Куйбышев исемендәге тимер юл магистраленең Шакша станцияһы элек артта ҡалған станцияларҙан һанала ине һәм поездарҙың нормаль үтеүҙәренә тотҡарлыҡ яһап килә ине. ВКП(б)-ның Өфө район комитете станцияның эшенә анализ яһап, уның насар эшләүенең сәбәптәрен асты. Станцияның эше тураһындағы мәсьәлә партия райкомының бюроһында тикшерелде. Бюро ултырышы тимер юл эшселәре араһында социалистик ярышты йәйелдереү, массовый-политик эште йәнләндереү буйынса конкрет саралар билдәләне. Станция партия ойошмаһы секретаре итеп инициативалы командир иптәш Порецкий һайланды. Ул ҙур дәрт менән эшкә тотондо. Һәр бер коммунисҡа партия поручениеһе бирелде, агитаторҙар сменаларҙа политик темаларға беседалар үткәрә башланылар, профсоюз ойошмаһының эше йәнләндерелде. Шакша станцияһы эшселәре коллективе бүлексәнең иң мөһим булған Дим—Кропачево участкаһы станцияларының эшселәре араһында социалистик ярыш инициаторы булып сығыш яһаны.

Үкенескә ҡаршы, күп кенә урында партияның ҡала һәм район комитеттәре тимер юл транспортындағы партия ойошмаларына былай туранан-тура етәкселек итмәйҙәр әле. Мәҫәлән, Ғафури һәм Ҡырмыҫҡалы райондары территорияһындағы Аҡ күл һәм Ҡарлыман станцияларының эше менән ВКП(б)-ның Ғафури һәм Ҡырмыҫҡалы райкомдары һис тә ҡыҙыҡһынмайҙар. Шуға күрә был станцияларҙа хатта элементар ғына тәртип тә юҡ: вагондар күп ваҡыт буш торалар, вокзалдар ҡаралмай, станцияларҙың начальниктәре Петров һәм Лукьянцев эскеселек менән шөғөлләнәләр.

ВКП(б)-ның Благовар һәм Бүздәк райкомдары ла үҙ райондарындағы тимер юл станцияларының эштәренә етәкселек итмәйҙәр. Был райкомдарҙың работниктәре уларҙың эштәре менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Унда үҙҙәренең лекторҙарын һәм агитаторҙарын ебәрмәйҙәр. Тимер юл эшселәре араһында политик-массовый эш алып барылмай. Благовар һәм Бүздәк станцияларының вокзалдарында станцияның эске тәртип ҡағиҙәләре еренә еткерелмәй, пассажирҙарға ҡарата тупаҫ мөнәсәбәттә булыу ваҡиғалары бик йыш осрай.

Черниковск ҡалаһы территорияһында Өфө бүлексәһенең ике ҙур ғына станцияһы — Черниковка һәм Бензин станциялары бар. Ләкин уларҙың икеһе лә һуңғы ваҡыттарҙа алдарына ҡуйылған бурыстарҙы үтәй алмайҙар. Ҡыш көндәрендә станция ҡарамағындағы юлдарҙы ҡар баҫыу арҡаһында ҡиммәтле йөктәр тейәлгән вагондар аҙналар буйына ҡуҙғалмай ултырҙылар. Хеҙмәт дисциплинаһы түбән. Станция начальнигенең урынбаҫары Соломенко һәм смена етәкселәре кәңәшмәләр үткәрмәйҙәр, станция етәкселәре, бигерәк тә партия ойошмаһы секретаре иптәш Шәрипов юл эшселәре араһында политик-массовый эш алып бармайҙар, социалистик ярыш ойошторолмаған. Шуға күрә, Черниковск станцияһының поездар йөрөшөнә тотҡарлыҡ яһаусы пунктҡа әйләнеүе ғәжәп түгел. ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитете работниктәре был турала беләләр ҙә, хәлде яҡшыртыу өсөн һис бер төрлө сара күргәнләре юҡ.

Тимер юл транспортына һәм ундағы партия ойошмаларына практик ярҙам итеү — ВКП(б)-ның тейешле ҡала һәм район комитеттәренең иң мөһим бурыстарынан береһе булып тора. Станцияларҙа, депо, юл дистанцияларында эшләүселәр араһында политик-массовый эште көсәйтергә, уны йөк тейәү һәм бушатыу, поездарҙың йөрөшө планын һис һүҙһеҙ үтәүгә, пассажирҙарҙы хеҙмәтләндереү эшен яҡшыртыуға йүнәлдерергә кәрәк.

М. Левитин.

—☆—

Орденле слесарь Алексей Гончаров

Завод бинаһының коридорҙары, баҫҡыс пролеттары аша үтеп, юғары ҡаттағы цехтарҙың береһенә индек. Рәткә теҙелеп киткән верстактар янындағы кешеләр үҙҙәренең эштәре менән мәшғүл. Беҙ өсөнсө рәттә верстак янында торған, аҡ йөҙле, майланып ялтыраған пинжәктәге кеше янына килеп туҡтаныҡ. Ул Өфө электротехник заводының маҡтаулы стахановсыһы Алексей Захарович Гончаров ине.

Верстак торған ике тәҙрә араһындағы стенаға матур итеп яҙылған ҙур плакат ҡуйылған. Унда заводтың партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары, эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр коллективтәре данлы слесарҙе бөйөк хеҙмәт наградаһы алыу менән ҡотлайҙар һәм киләсәктә эшендә уңыштар теләйҙәр.

Ғәҙәт буйынса иҫәнлек-һаулыҡ һорашҡандыҡ һуңында Алексей Захарович үҙенең хеҙмәт юлы тураһында һөйләп бирҙе. Ул был заводта 19 йыл эшләй. Ҡара эшсенән юғары квалификациялы слесарь булыуға өлгәшкән.

Иптәш Гончаров ленинградлыларҙың саҡырыуы буйынса заводта беренсе булып биш йыллыҡты срогынан бер йыл алда үтәү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышты башлап ебәреүҙә инициатор булды. Ул сталинсе биш йыллыҡта 15 йыллыҡ норма үтәргә йөкләмә алды һәм үҙе менән тиңләшергә заводтың кадровой эшселәре Мансаков һәм Шухов иптәштәрҙе саҡырҙы.

Биргән вәғәҙәһен практик тормошҡа ашырыуға күнеккән производственник алған йөкләмәһен үтәү өсөн көрәшә. Ул ағымдағы йылдың беренсе ғинуарына 6 йыллыҡ норма үтәне. 1 апрелдә 1952 йыл иҫәбенә продукция биреүҙе тамамланы.

Был уңышлыҡ кесәркәнеллә хеҙмәт менән яулап алынды. Иптәш Гончаров стахановсы-новаторҙарҙың эш методтарын өйрәнә, уларҙы практик ҡуллана. Бирелгән заказдарҙың чертеждарын ентекле тикшерә. Команда аппараттарының 15—20 корпустарын верстакҡа ике рәткә теҙеп ҡуя һәм һәр бер операцияны айырым башҡара. Бер деталде йыйнағандан һуң икенсе, өсөнсө операцияларға күсә. Уның һәр бер хәрәкәте иҫәпле. Ошолай эшләү аппараттарҙы йыйнау ваҡытын ҡыҫҡарта, планды арттырып үтәүгә мөмкинлек бирә.

Хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт өлгөләре күрһәткән алдынғы слесарь иптәш Алексей Захарович Гончаровҡа ошо көндәрҙә Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены тапшырылды. Иптәш Гончаров хөкүмәттең бөйөк наградаһына яуап итеп көндәлек заданиеһен 250—300 процентҡа еткереп үтәй.

С. Мәүлютов.

Заемға яҙылыуҙа республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре ҙур активлек күрһәтәләр!

Аҡсалата взностар индерәләр

САҠМАҒОШ. (Телефон аша). Өсөнсө государство заемы сығарыу тураһындағы ҡарар радио аша тапшырылған көндө райондың бөтә колхоздарында күп халыҡлы митингылар булды.

Ҡара Ерәк ауылында 68 йәшлек Йыһанша Фәттәхов митингыла сығыш яһап:

— Һуғыш килтергән яраларҙы тиҙерәк уңалтыу һәм халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн мин 300 һумға заемға яҙылам, — тине һәм аҡсаһын шунда уҡ индерҙе.

Был ауыл Советындағы колхоздарҙа подписканың тәүге сәғәтендә үк колхозсылар 25 мең һум заемға яҙылдылар һәм аҡсаһын тулыһынса индерҙеләр. Кәсәпәй ауыл Советында 20 мең, Үрнәк ауыл Советында 50 мең һәм Имәнлекүл ауыл Советында 26 мең һумлыҡ подписка йыйылып, аҡсалары индерелде.

4 майға ҡарай кискә сәғәт 4-кә тиклем районда заемға яҙылыу суммаһы 1 миллион 600 мең һум ташкил итте һәм шул иҫәптән 560 мең һум взнос индерелде.

М. Динникеева.

* * *

БАҠАЛЫ. (Телефон аша). Район игенселәре араһында яңы заем ҙур күтәренкелек менән урынлаштырыла. Аҡман, Ҡурғабаҡ, Гусево һәм Иҫке Хорес ауыл Советтарындағы колхоздарҙа подписка айырыуса яҡшы үтте.

«Марс» колхозында 90 йәшлек Сәйфетдинов Сәлах 250 һум заемға яҙылды, шунда уҡ аҡсаһын индерҙе. Уның өлгөһөнә Моратов Солтан, Абдуллин Рәхмәтулла ҡарттар ҙа 200-әр һумлыҡ подписка бирҙеләр. Ленин исемендәге колхоза комсомолец Хафизов, Халимов, Солтанов, Нурыев иптәштәр ҙә 300 — 450-шәр һумға яҙылып, заем аҡсаһын тапшырҙылар.

Бер тәүлек эсендә районда колхозсылар подписка буйынса 52 мең һум взнос индерҙеләр.

Т. Халикова.

* * *

БӨРЙӘН. (Телефон аша). СССР Министрҙар Советенең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһындағы ҡарарын район хеҙмәтсәндәре ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар. Был ҡарар районың бөтә колхоздарында һәм учреждениеларында иң ойошҡан рәүештә заемға яҙылыу башланды. «Урал», «Яңы юл», «Ҡыҙыл таң» һәм Киров исемендәге ауыл хужалығы артелдәрендә, «Берлек» һәм Чапаев исемендәге промысловый артелдәрендә заем взносы 100 процентҡа аҡсалата индерелде.

Кискә 10 сәғәткә район буйынса 271 мең һумлыҡ заем таратылды.

Тыуған илебеҙҙе тағы ла ҡеүәтлерәк итеү өсөн

БАЙМАҠ. Районда Өсөнсө государство заемына яҙылыу ҙур күтәренкелек менән бара. Бөтә колхоздарҙа күп халыҡ ҡатнашлығында митингылар үткәрелеп, шунда уҡ заемға яҙылыу башланды. Митингыла сығыш яһаусы «Победа» колхозы председателе былай тине:

— Тыуған илебеҙҙе тағы ла ҡеүәтлерәк итеү өсөн беҙҙең колхоз бөтә көсөн һәм средстволарын йәлләмәйәсәк. Илебеҙҙең халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн мин государствоға бурысҡа 2 мең һум аҡса бирәм. — һәм иптәш Горьков шунда уҡ заем взносын тулыһынса аҡсалата индерҙе.

Шул уҡ колхоздың колхозсылары Ермилов Иван, Баскаков, Ватан һуғышы инвалиде Харитонов иптәштәр һәм ҡайһы 500-әр һумлыҡ заемға яҙылып, заем взносын аҡсалата индерҙеләр.

3 май көндө кискә 10 сәғәткә «Победа» колхозы колхозсылары заем взносының 25.175 һумын аҡсалата индерҙеләр.

Райондың башҡа колхоздарында ла заемға яҙылыу ҙур активлек менән үтте. Баймырҙа ауыл Советы колхоздарында заем взносының 26 мең һумын, Муҡасов ауыл Советы колхоздарындағы колхозсылар — 19 мең һумын аҡсалата индерҙеләр. Район буйынса 3—4 сәғәт эсендә 650 мең һумлыҡ заем урынлаштырылып, уның 305 мең һумы аҡсалата индерелде.

Заемға яҙылыу дауам итә.

Һүрәттә: агрегат заводы эшселәре яңы заемға яҙылалар. Һулдан уңға — цех партбюро секретаре Петров, заточник Ғилажев, строгальщик Афанасьев, резьбалар шлифовать итеүсе Козлова иптәштәр. Улар һәр ҡайһыһы берәр айлыҡ һәм унан да күберәк хеҙмәт хаҡы күләмендә яңы заемға яҙылдылар.

В. Жданов фотоһы.

СССР Финанс Министерствоһының белдереүе

1948 йылдың 3 майында 20 миллиард һумға сығарылған СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы 4 май аҙағына, сығарылған заемдың билдәләнгән суммаһынан 119 миллион һумға артыҡ итеп, 20.119 миллион һумлыҡ таратылды.

Заемға яҙылыу дауам итә.

ССР Союзы Финанс Министре А. КОСЫГИН.

—☆—

Заемға яҙылыу уңышлы бара

Башҡортостанда яңы заемға яҙылыу 203.614 мең һумға етте, йәғни бюджет суммаһынан 10.314 мең һумға арттырып үтәлде. Шул иҫәптән, республика эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре 162.197 мең һумлыҡ, колхозсылар 41.417 мең һумлыҡ подписка бирҙеләр. Колхозсыларҙан подписка буйынса 9.474 мең һум аҡса индерелде.

Заемға яҙылыу башҡалала ҡыҫҡа срокта үтте. Подписка суммаһы 44.511 мең һум ташкил итә. Был бюджет суммаһына сағыштырғанда 4.311 мең һумға артыҡ.

Белорет металлургтары, Октябрьск һәм Ишембай нефтселәре, Черниковск эшселәре һәм Стәрлетамаҡ хеҙмәтсәндәре араһында яңы заемға яҙылыу шулай уҡ ойошҡан рәүештә башҡарыла.

Яңауыл, Бәрйән, Саҡмағош, Кушнаренко һәм башҡа күп райондарҙың игенселәре яңы заемға яҙылыуҙа бик ҙур активлек һәм ойошҡанлыҡ күрһәттеләр. Был райондарҙа подписканың бюджет суммаһы байтаҡ арттырылып үтәлде һәм колхозсылар, взностар иҫәбенә, бик күп аҡса индерҙеләр.

—☆—

Нефтселәр ҡалаларында

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша) Яңы заем сығарылыу тураһындағы хәбәр ҡаланың бөтә предприятиеләрендә, цехтарында, участкаларында йәшен тиҙлеге менән таралды. Бөтә предприятиеләрҙә митингылар уҙғарылды. Унда сығыш яһаусылар хөкүмәттең заем сығарыу тураһындағы ҡарарын хуплап, уға яҙылырға үҙ коллективтарын саҡырҙылар.

— Хөкүмәтебеҙҙең яңы заемы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәргә ҙур ярҙам итер, илебеҙҙең ҡеүәтен тағы ла арттырыр, тормошобоҙҙо яҡшыртыр. Минең айлыҡ эш хаҡым 1.300 һум. Мин 2.300 һумлыҡ заемға яҙылам — тине икенсе промысел ключнигы иптәш Ғәбитов.

Уның өлгөһөндә мастер Гончаров 1.300 һумлыҡ, оператор Бабичева 1.100, промысел директоры Тереғулов 4 мең һумлыҡ заемға яҙылды.

Был промысел ҡалала беренсе булып ике сәғәт ваҡыт эсендә заемға яҙылыуҙы тамамланы. Бында заемға яҙылыуҙың дөйөм суммаһы айлыҡ хеҙмәт хаҡы фондының 103.2 процентен тәшкил итә.

Шулай уҡ ҡаланың өс промыселе, газ-компрессор хужалығы, коммуналь контора коллективе һәм башҡа предприятиелар заемға яҙылыуҙы ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уңышлы тамамланылар. Бөтә предприятиеләрҙә лә заемға яҙылыу бер айлыҡ хеҙмәт хаҡын биреү лозунгыһы аҫтында бара.

Дүрт сәғәт ваҡыт эсендә бөтә ҡала буйынса 6.871 кеше 4 миллион 67 мең һумлыҡ заемға яҙылды. Заемға яҙылыу дауам итә.

Ғ. Ибраһимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

* * *

ОКТЯБРЬСК. (Телефон аша). Хөкүмәттең СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемына яҙылыу нефтселәр араһында ҙур күтәренкелек менән дауам итә. Буровойҙарҙа, промыселдарҙа, тәҙелеш предприятиеларенда һәм башҡа учреждениеларҙа күп халыҡ ҡатнашлығында митингылар үтте. Сығыш һөйләүсе эшселәр хөкүмәт ҡарарын ҡайнар хупланылар.

Бораулау конторҙһында булып үткән митингыла республиканың атаҡлы бораулау мастеры иптәш Куприянов беренсе булып сығыш яһаны һәм 2.500 һумға подписка бирҙе. Уның артынан мастер Балабанов 3 мең һумға яңы заемға яҙылды.

1-се номерле төҙөлеш управлениеһенең балта оҫтаһы Храпков һәм слесарь Кулешов иптәштәр һәр береһе 1.200 һумға заемға яҙылдылар.

Бер нисә сәғәттә 3-сө номерле төҙөлөш управлениеһе коллективе айлыҡ хеҙмәт хаҡына сағыштырғанда, 112,6 процент, Туймазы территориаль төҙөлөш управлениеһе коллективе — 116,8 процент подписка бирҙе.

—☆—

ҺАҠЛЫҠ КАССАЛАРЫНДА ҺАҠЛЫҠТА ЙӘКИ ЗАЛОГТА БУЛҒАН ОБЛИГАЦИЯЛАРҘЫ АЛЫШТЫРЫУ

Облигациялар алыштырыу тураһында СССР Министрҙар Советы тарафынан раҫланған ҡағиҙәләргә ярашлы рәүештә, государство заемдарын конверсион заемдарға алыштырыу айҡанлы, һаҡлыҡта йәки ссуда буйынса залогта булған облигацияларҙы алыштырыу һаҡлыҡ кассалары тарафынан заем хужаһы үҙе килгәс, йәки уның яҙма ғаризаһы буйынса үткәрелә.

Облигациялар алыштырыуҙы оформить итеү өсөн һаҡлыҡ кассаһына һаҡлыҡ танытмаһы йәки залог квитанцияһы алып килергә йәки уны почта аша ебәрергә кәрәк. Бынан тыш, залогҡа һалып ссуда алынған облигацияларҙы алыштырыу өсөн алынған ссуданың суммаһын аҡсалата индерергә йәки почта аша ебәрергә кәрәк. Был хәлдә залогҡа һалынған облигацияларҙың хужаһы ссуданан файҙаланған өсөн артҡан процентарҙы түләүҙән ҡотҡарыла.

Әгәр ҙә һаҡлыҡҡа йәки залогҡа һалынған облигацияларҙы алыштырыу заем хужаһының яҙма ғаризаһы буйынса үткәрелһә, ул ваҡытта 1948 йылғы ике процентле государство заемына алыштырылырға тейеш булған элекке заем облигациялары, заем тотоусының теләге буйынса, һаҡлыҡ кассаһында һаҡлыҡта ҡалдырыла йәки ҡиммәтле пакет менән уның адресына ебәрелә.

Облигациялар алыштырыу 1948 йылдың 1 авгусына тиклем үткәрелә.

Һаҡлыҡта йәки залогта булған һәм 1948 йылдың 1 авгусына тиклем һаҡлыҡ кассаларынан юллап алынмаған облигациялар государство файҙаһына тапшырыла.

Колхозсыларҙың активлеге

БОРАЙ. (Телефон аша). Райондың хеҙмәтсәндәре хөкүмәтебеҙҙең СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһындағы ҡарарын ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Ошо айҡанлы бөтә колхоздарҙа һәм МТС-тарҙа күп халыҡ ҡатнашлығында митингылар, йыйылыштар уҙғарылды, һәм шунда уҡ заемға яҙылыу, аҡса индереү башланды.

Әжәт ауыл Советындағы колхоздарҙың членддары ике сәғәт ваҡыт эсендә 47.400 һумлыҡ заемға яҙылып, шунда уҡ тулыһынса аҡсаһын индерҙеләр. Улар үҙҙәре менән тиңләшергә саҡырып райондың бөтә колхозсыларына мөрәжәғәт иттеләр.

Был саҡырыуға Мулла ауыл Советындағы колхоздарҙың членддары беренсе булып ҡушылдылар. Улар 44 мең һумлыҡ заемға яҙылып, тәүге көндә уҡ аҡсаһын индереп бөттеләр. Ҡайынлыҡ ауыл Советындағы колхоздарҙа ла заемға яҙылыу ҙур ойошҡанлыҡ һәм колхозсыларҙың активлеге менән үтте.

Район хеҙмәтсәндәре тәүге көндә бөтәһе 800 мең һумлыҡ заемға яҙылып, 300 мең һум взнос аҡсаһын индерҙеләр.

Г. Ишмитов.

Заемға яҙылыу хроникаһы

ҠАРИҘЕЛ. СССР Министрҙар Советенең Өсөнсө государство заемын сығарыу тураһындағы ҡарарын район хеҙмәтсәндәре ҙур күтәренкелек менән ҡаршыланылар. Бөтә колхоздарҙа, предприятиеләрҙә һәм учреждениеларҙа был ҡарарға арналған митингылар үтте. Заемға яҙылыуҙың тәүге көнендә үк ауылдар буйынса 120 мең һумлыҡ, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр буйынса 665 мең һумлыҡ заем таратылды. Байҡы ауыл Советы буйынса йыйналған 30 мең һумлыҡ подписканың 20 мең һумы аҡсалата индерелде. Байҡы сельпоһының «Спартак» артеле членддары һәр береһе бер айлыҡ һәм ай ярымлыҡ хеҙмәт хаҡына яҙылдылар. Заемға яҙылыу һәм взностар индереү дауам итә.

* * *

Яңы заем сығарыу тураһындағы хәбәр Учалы район хеҙмәтсәндәре тарафынан ҡайнар һәм берҙәм рәүештә хупланды.

Райондың тиҫтәләгән колхоздары бер нисә сәғәттә заемға яҙылыуҙы тамамлап, шунда уҡ аҡсалата взнос индерҙеләр. «Октябрь» ауыл хужалығы артелендә заемға яҙылыу 3 май көнөндә үк тамамланды.

Учалы рудниге коллективе членддары государствоға бурысҡа бер айлыҡ хеҙмәт хаҡтарын бирҙеләр. Бөтә колхоздар, учреждениелар, предприятиеләрҙә лә заем сығарыуға арналған митингылар үткәрелде.

* * *

Дыуан районында заемға яҙылыу ҙур активлек менән үтте. 3 май көндө эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһында 800 мең һумлыҡ, колхозсылар араһында 650 мең һумлыҡ заем таратылды. Райондың игенселәре 30 мең һум взнос индерҙеләр.

* * *

Мәсетле районының Әбдрәхим, Ҡыҙылбай ауыл Советтары буйынса заемға яҙылыу 3 сәғәт ваҡыт эсендә тамамланып, 60 мең һумдан артыҡ взнос аҡсалата индерелде. Райондың башҡа ауыл Советтарында ла заемға яҙылыу ойошҡан рәүештә бара.

* * *

Ҡыйғы районының игенселәре СССР Министрҙар Советенең яңы заем тураһындағы ҡарарына берҙәм яуап бирҙеләр. Аҙ ғына ваҡыт эсендә колхозсылар араһында таратылған заем суммаһы 194 мең һум, эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһында таратылған заем суммаһы 214 мең һум тәшкил итә.

* * *

БҮЗДӘК. Районда яңы заемға яҙылыу ҙур политик күтәренкелек менән бара. Бер тәүлектә 7.627 кеше 1.670 мең һумлыҡ заемға яҙылды. Шул сумманың 229 мең һумы аҡсалата индерелде лә инде.

Ахун ауыл Советында (председателе иптәш Ғәлин) бөтәһе 49 мең һумлыҡ заемға яҙылып, 29 мең һумы шунда уҡ түләнде. «Лена», Фрунзе исемендәге колхоздарҙа подписка суммаһының 75 процентҡа аҡсалата индерелде.

Өфөлә яҙ

Һүрәттә: Өсөнсө номерле кыҙҙар мәктәбенең 8-се «А» класс уҡыусылары **Рима Нефедова, Рәүилә Мөслимова** һәм **Лида Трачук** Салауат исемендәге баҡсала китап уҡыйҙар.

В. Жданов фото-этюде.

„Урман аҙнаһын" ойошкан рәүештә үткәрәйек

Урман—беҙҙең илебеҙҙең байлығы

Урман — беҙҙең социалистик Ватаныбыҙҙың байлығы ул. Был байлыҡтар бары тик беҙҙең илебеҙҙә генә тотошо менән халыҡ хужалығына хеҙмәт итеүгә ҡуйылған.

Ағас промышленность һәм торлаҡтар төҙөлөшөнә, тимер юл вагондарын эшләүгә, судноляр, мәктәптәр төҙәүгә, мебелдәр, шырпы, ҡағыҙ, пластмасс, целлюлоза етештереүгә китә һәм унан башҡа күп төрлө әйберҙәр эшләнә.

Ағастар төрлө төрҙәргә бүленә һәм уларҙың ҡайһы берҙәре, мәҫәлән, юкә ағасы хужалыҡта айырыуса ҙур ҡиммәтле урын тота. Башҡортостандың юкә ағасы хатта бөтә Советтар Союзында иң яҡшы юкә ағастарының береһе булып иҫәпләнә. Бер төп юкә ағасы сәскәһе, 1 гектар ҡара бойҙай сәскәһе ҡүпме бал бирһә, шул тиклем бал бирә ала. Сатләүек ағасының сәтләүектәренән, юғары сифатлы май эшләнә. Урманда күп төр дарыу үсемлектәре, емеш-еләктәр үҫә.

Тәбиғи урмандар һәм ҡулдан ултыртылып үҫтерелгән баҫыу һаҡлау урман полосалары социалистик баҫыуҙарҙың урожайлылығын күтәреүгә айырыуса яҡшы йоғонто яһайҙар.

Йәй килеп, урман кешеләрҙең ял итеүе өсөн иң яратҡан урыны. Бөтә санаторийҙәр, курорттар, ял йорттары тәбиғи урманлыҡтар араһына урынлашҡандар.

Бына ни өсөн дә беҙҙең государствобыҙ урман байлыҡтарын ныҡ һаҡлауға һәм урмандарҙы тәрбиәләүгә, ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы йәшелләндереүгә, баҫыуҙарға урман полосалары ултыртыуға айырыуса әһәмиәт бирә һәм уға бөтә общественностең фекерен йүнәлдерә.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планда Башҡорт АССР-ы буйынса 25 мең гектарҙан артығыраҡ урманһыҙ майҙанға ағастар ултыртыу ҡуҙә тотолғайны. Уға ялан яҡҡан урындарҙы, ул меңдәрсә гектар түбәләктәрҙе, тау итәктәрен өҫтәһәк, ул сағында ағас ултыртыу һәм тәбиғи урманлыҡтарҙы аяҡҡа баҫтырыу эштәрен ойоштороуҙың ниндәй ҙур халыҡ хужалығы әһәмиәте булғанлығы тағы ла асығыраҡ күренәсәк.

Шулай ҙа урындарҙа булған урман фондын һаҡлауға, ағастар ҡырҡҡанда ул урындарҙы тейешенсә таҙартыуға етерлек иғтибар бирелмәй әле. Бында беҙҙең урман промышленносе һәм урман хужалығы работниктәре лә ныҡ кисекен көрәш ойоштормағандар.

Беҙ булған урмандарҙы яҡшы һаҡлау, тәрбиәләү, ағастарҙы тейешенсә эшкәртеү менән бер рәттән, ҡалаларҙы, эшселәр посёлкаларын, район үҙәктәрен һәм ауылдарҙы йәшелләндерергә тейешбеҙ. Ошо маҡсат менән дә илебеҙҙә йыл һайын «Урман аҙнаһы» үткәрелә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының һәм ЕКП(б) Өлкә Комитетының ҡарары нигеҙендә ошо йылдың 5 майынан республикабыҙҙа «Урман аҙнаһы» үткәреү иғлан ителде. Ул 12 майға тиклем дауам итәсәк. Аҙна «йәшел дуҫтарҙы һаҡлау» һәм йәшелләндереү өсөн хеҙмәтсәндәрҙең массовый походына әүерелергә тейеш. Беҙ халыҡ йәшәгән һәр бер урынды, колхоз, совхоз, МТС, мәктәп, больница, промышленность предприятиеһе тирәһен йәшел ағастар менән солғап алырға тейешбеҙ. Шуға күрә «Урман аҙнаһы» үткәреүҙә бөтә халыҡтың актив ҡатнашыуына өлгәшергә кәрәк. Был тәңгәлдә урман хужалығы работниктәре, урындағы совет, партия, комсомол, профсоюз һәм башҡа ойошмалар хеҙмәтсәндәр араһында киң аңлатыу эшен ойоштороргә бурыслылар.

Х. Тезмешев.

Башҡортостан урман хужалығы управлениеһенең ағас әҙерләү бүлеге начальнигы.

С. Кудаш

Хеҙмәт

Мәктәп баҡсаһында бөгөн
Бик күцелле эш бара:
Тырышып, тирҙәргә батып.
Өс бала ерҙәр ҡаҙа.
Ултырталар улар бында
Мичурин ағастарын,
Алмаларҙың аллаяышып
Баллы буласаҡтарын.
Алмағастар күккә үрелеп,
Күркәмләнеп үҫерҙәр.
Сәскәләре ергә түгелеп,
Алмалары бешерҙәр...
Бәлки, ул саҡ был балалар
Булмаҫтар был баҡсала.
Файҙаһын күрер хеҙмәттең
Бында ҡалған башҡалар.
Ҡайҙа булһалар ҙа улар,
Кешеләр бәхет теләр,
Татлы алма кәүек тәмле —
Тел менән һағынып һөйләр
Гүмерҙәре, алмағастай,
Яҙ һайын япраҡ ярып.
Һәйкәл булып хеҙмәттәре
Мәңгегә илдә ҡалыр!

Яландарҙы йәшелләндереү

Урман хужалығының Башҡортостан управлениеһе быйыл 700 гектар ағас ултырта. Урман-ялан райондарында (Ауырғазы, Баҡалы, Благовещен) 80 гектар урман питомниге һалына. Республиканың бөтә 40 лесхозы буйынса 4900 гектар майҙанда ағас ултыртыу башҡарыласаҡ. Бары тик имән ағасы ғына 500 гектар майҙанға ултыртыла. Бынан тыш әле, сәтләүекле ағас үҫтереләсәк. 16 гектар майҙанда бересклет ағасы ултыртыла, 3 мең гектарҙан артыҡ майҙанда ҡарағай ағастары ултыртыу билдәләнгән.

Быйыл сәсеү өсөн 65 мең килограмм имән сәтләүеге, 1600 килограмм ҡайын, юкә, саған орлоҡтары һәм 2400 килограмм ҡыуаҡ ағастары орлоҡтары әҙерләнде, 800 килограмм әле ағастар орлоғо бар. **Р. Ҡолмөхәмәтов.**

КУЛЬТУРА-АҒАРТЫУ УЧРЕЖДЕНИЕЛӘРЕНӘ ИҒТИБАРҘЫ КӨСӘЙТЕРГӘ

Мәкәр районы Салих ауылы клубы тураһында колхозсылар:

— Унда барған һайын бараһы килеп кенә тора. Яҡты ла, йәмле лә. Концерт ҡарап, радио тыңлап, яңылыҡтар ишетеп ҡайтаһың, — тиҙәр.

Ысынлап та, Мәкәр районының Салих ауылы клубы культура усағына әйләнде.

Клубта массовый эш конкрет план буйынса, тәрән йөкмәткеле итеп үткәрелә. Политик һәм фәнни темаларға ай һайын 3—4 тапҡыр доклад, лекциялар яһала. Клуб эргәһендә колхозсылар[illegible] ҙың иптәш Сталин биографияһын өйрәнеү, агротехник һәм художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәктәре регуляр эшләй. Клуб мөдире иптәш Абдуллина:

— Яңы сәсеү осоронда эште беҙ баҫыуға күсерәсәкбеҙ. Ял ваҡыттарында колхозсылар өсөн концерттар бирәсәкбеҙ, — ти.

Ошондай уҡ ҙур һәм йөкмәткеле эштәр Ҡоҙән ауыл клубы, Урманбишҡаҙаҡ уҡыу өйө, Мәкәр ауыл библиотекаларында ла үткәрелә.

Мәкәр районындағы бөтә культура-ағартыу учреждениеләрендә эш яҡшы ҡуйылған, тип әйтеп булмай. Райондағы 4 библиотека, 33 клуб, 11 уҡыу өйө һәм 12 ҡыҙыл мөйөштөң күпселегендә культура-массовый эштәрҙең ҡуйылышы бөгөнгө талаптарға яуап бирерлек түгел. Ишәй, Энгән, Ново-Георгиевский, Эткол, һайран ауыл Советтарындағы уҡыу өйҙәре, библиотекалар [illegible] 1939—1940 йылдарҙа [illegible]

Күп кенә ауыл Советы, колхоз председателдәре, хатта ҡайһы бер район етәкселәре лә культура-ағартыу учреждениеләренә иғтибар бирмәйҙәр: биналарҙы ваҡытында ремонтлау, йыһазландырыуҙа клуб, уҡыу өйө, библиотека мөдирҙәренә конкрет ярҙам күрһәтмәйҙәр. Төҙәк биналарҙы икенсе маҡсаттарға файҙаланыуға мәжбүр итеүселәр ҙә юҡ түгел. Бардашле ауыл Советы председателе иптәш Недошкин уҡыу өйөн колхоздың тәлкә фермаһы итергә бойороҡ биргән. Ә Янрус ауыл Советы председателе иптәш Абдуллин уҡыу өйөн сельмагҡа әйләндертҡән. Һөҙөмтәлә был ике ауылдың да хеҙмәтсәндәре үҙҙәренең буш ваҡыттарын ҡайҙа барып үткәрергә лә белмәйҙәр.

Район үҙәгендә лә яҡшы культура йорто булырға тейеш ине. Ләкин Петровскийҙа серен бөткән клуб бинаһынан башҡа бер нәмә лә юҡ. Бында ҡышын һалҡын, йәйен эҫе була. Шул арҡала, [illegible]

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы 1946 йыл район үҙәгендә яңы культура йорто һалыу өсөн 50 мең һум аҡса бүлгәйне. Шуның 10.200 һумына урманда 300 кубометр бурана әҙерләнде. 29 кубометры ташылды. Эш шуның менән туҡтап ҡалды. Район Советы председателе иптәш Солтанов ҡалған аҡсаны башҡа маҡсат менән тотонып бөттө, ә килтерелгән бүрәнәләрҙе коммуналь торлаҡтарҙы ныҡытырҙы. Хәҙер: «Районда культура йорто һалып булыр микән, белмәйем» ти.

Культура-ағартыу учреждениеләренә булған иғтибарһыҙлыҡ бында иң һуңғы сигенә еткән.

Райондың бөтә партия, совет һәм культура-ағартыу работниктәре идеологик эштең был яуаплы участкаһын яҡшыртыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр.

Ғ. Ҡотлобаев.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Сит илдәрҙән телеграммалар

Төньяҡ Кореяның халыҡ собраниеһе Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проектын хупланы

ПХЕНЬЯН, 3 май. (ТАСС). 28 һәм 29 апрелдә Төньяҡ Корея халыҡ собраниеһенең Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проектын тикшереү өсөн саҡырылған нәүбәттән тыш сессияһы булды.

Сессия эшендә Төньяҡ Корея халыҡ собраниеһенең 219 депутаты ҡатнашты. Сессияла Корея общественноһенең шулай уҡ 90-дан артыҡ вәкиле, шул иҫәптән Көньяҡ Кореяның 40 вәкиле ҡатнашты.

Халыҡ собраниеһенең конституцион комиссияһы председателе Ким ду Бон Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проекты тураһында доклад менән сығыш яһаны.

Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһы проектының әһәмиәте тураһында һөйләп, докладсы, конституция проекты Корея халҡын үҙе теләгәненә тупларға, Кореяның берҙәм бойондороҡһоҙ демократик государствоһын төҙөү өсөн көрәшкә берләштерергә саҡырылған, тип айырыуса билдәләне.

Конституция проектын тикшереүҙә, Американың Көньяҡ Кореялағы хәрби властары бығa репрессиялар юлы менән төрлөсә ҡаршылыҡ күрһәтергә тырышһалар ҙа, Төньяҡ Кореяла ғына түгел, бәлки Көньяҡ Кореяла ла Корея халҡының киң ҡатламдары ҡатнашты, тине докладсы. Конституцион комиссия адресына халыҡтан [illegible] конституция проекты хупланды, бөтәһе 57 мең хат килде.

Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проекты Корея халҡының [illegible] «халыҡ демократияһы» принцибе һалынған, тип күрһәтеп докладсы Көньяҡ Корея реакционерҙарының халыҡҡа ҡаршы конституция төҙөү юлы менән, Корея халҡын демократик хоҡуҡтарҙан мәхрүм итергә маташыуҙарын фаш итте.

Корея халҡы, тине Ким ду Бон, азатлыҡ һәм демократия теләй. Корея халҡы ер, 8 сәғәтлек эш көнө, эре промышленностең национализацияланыуын теләй. Уға быларҙың бөтәһен дә бары тик халыҡ власы ғына бирә ала. Үҙенең мең йыллыҡ тарихендә бер ҡасан да, ти һөҙөмтәләү һүҙе итеп Ким ду Бон, Корея халҡының Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проектында күҙә тотолған шундай демократик хоҡуҡтары һәм азатлыҡтары булғаны юҡ ине.

Ким ду Бондың докладсы буйынса фекер алышыуҙарҙа 18 депутат сығыш яһаны. Сығып һөйләүселәр, конституция проектын тикшереүҙә актив ҡатнашыусы Корея халҡының был проектты тулыһынса яҡлағанлығын белдерҙеләр, улар, Корея халыҡ-демократик республикаһы конституцияһының проекты Кореяның берҙәм бойондороҡһоҙ демократик государствоһын төҙөүҙе тиҙләтеү эшенә хеҙмәт итәсәк, тип айырыуса билдәләнеләр.

Проектты статьялап тикшергәндән һуң тауышҡа ҡуйылған һуң халыҡ собраниеһе сессияһы конституция проектын индерелгән төҙәтеүҙәр менән бергә тауышлап хупланы һәм уны киләсәк дөйөм Кореяның законнар сығарыусы собраниеһенә раҫлау өсөн индерергә ҡарар ҡабул итте.

Италия социалистик партияһы башҡарма комитетының коммюникеһе

РИМ, 3 май. (ТАСС). Италия социалистик партияһының башҡарма комитете официаль коммюникела партия эсендә үҙен «автономистик ағым» тип атап йөрөтөүсе фракцияның төҙөлөүен ғәйепләй. Был фракция милли советтең яҡын киләсәк ултырышында социалистик партияның ғәҙәттән тыш съезын саҡырыу тураһындағы мәсьәлә ҡуйыласағына ҡарамаҫтан, түбәндәге ойошмаларҙа таратыу эше алып барырға маташа.

Социалистик партия башҡарма комитете «партия уставына һәм уның хәҙерге эшмәкәрлегенә ҡап-ҡаршы килеүсе ошондай фракцион позицияға ҡарата үкенес белдерә», һәм Сарагаттың тап ошондай фракцион позицияһы һөҙөмтәһендә 1947 йылдың ғинуарында тарҡалыу килеп тыуҙы, тип хәтергә төшөрә. Башҡарма комитет был айҡанлы партия члендарын «партияның тәүге ойошмаларында ҡаушап ҡалыусылыҡ һәм ышанмаусылыҡ килтереп тыуҙырыу ихтималы булған инициативаны яҡламаҫҡа» саҡыра.

Европа өсөн экономик комиссияның өсөнсө сессияһында

ЖЕНЕВА, 4 май. (ТАСС). Европа өсөн экономик комиссия сессияһының кисә киске ултырышы аҙағында Советтар Союзы делегацияһының етәксеһе Арутюнян белдереү менән сығыш яһаны.

«Совет делегацияһы, — тине Арутюнян, — һуңғы ваҡытта бында билдәле булған бер факт айҡанлы түбәндәге белдереүҙе яһай һәм был белдереүҙе протоколға индереүҙе һорай:

Европаның экономик комиссияһы Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы Европа илдәренең ойошмаһы булып тора. Ул эшлекле нигеҙҙә Европа илдәренең экономикаһын аяҡҡа баҫтырыуҙың һәм үҫтереүҙең актуаль мәсьәләләрен ҡарарға һәм Европа илдәренең тиң хоҡуҡлылығын һәм милли суверенитетен хөрмәт итергә һәм был комиссияла ҡатнашыусы бөтә илдәрҙең хоҡуҡтарын хөрмәт итергә тейеш.

Советтар Союзы делегацияһы Европаның экономик комиссияһының өсөнсө сессияһы асылыр алдынан, 25 апрелдә, Англия һәм АҠШ делегацияларының Европа экономик комиссияһына ҡаршы блок төҙөү өсөн 16 илдең һәм АҠШ-тың сепаратный кәңәшмәһен саҡырғанлыҡтарын белде.

Кәңәшмәлә Европа экономик комиссияһының ошо өсөнсө сессияһы көн тәртибендә тороусы күп кенә мәсьәләләр тикшерелде. Кәңәшмәне саҡырыуҙың инициаторҙары был мәсьәләләр буйынса Европа экономик комиссияһы эсендә блоктың позицияһы тураһында, шулай уҡ блоктың тауыш биреүе тураһында килешергә уйлайҙар.

Бындай сараларҙы инглиздәрҙең һәм американлыларҙың Европа экономик комиссияһы эсендә лә үҙҙәренең тарҡатыу политикаларын үткәрергә маташыуҙары итеп ҡараудан башҡаса баһалап булмай.

Советтар Союзы делегацияһы Европа экономик комиссияһы эсендә Англияның һәм АҠШ-тың бындай тарҡатыу политикаһын ныҡ ғәйепләй. СССР делегацияһы, Европа экономик комиссияһындағы күпселек Англияның һәм АҠШ-тың тарҡатыу политикаһын яҡламаҫ һәм беҙҙең сессиябыҙҙың көн тәртибендәге мәсьәләләр блок ҡараш нөктәһенән тороп түгел, ә эшлекле рәүештә тикшереләсәктәр, тауыш биреү ваҡытында Европа экономик комиссияһы эсендә инглиздәр һәм американлылар төҙөргә тырышҡан блок күпселегенең механик тауыш биреү машинаһы хәрәкәт итмәйәсәк, тип иҫәп тота».

Ошо белдереүҙән һуң Англияның делегаты Уэйли (Макнейл ултырыштан китте) үҙенең асыуланыуын йәшерә алмайынса, «үҙ министренең» күрһәтеүе буйынса ошо делегаттарҙы ысынлап та йыйғанлығын һәм Европа экономик комиссияһының өсөнсө сессияһы көн тәртибендә торған күп кенә мәсьәләләрҙе уларҙың «алдарында араҡы һалынған рюмка торған хәлдә» тикшергәнлектәрен әйтеп бирҙе. Ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса, тине ул, беҙ тулыһынса килешеүгә өлгәштек, ә ҡайһы берҙәре буйынса килешә алмаыҡ.

ТЫШҠЫ ПОЛИТИКА МӘСЬӘЛӘЛӘРЕ БУЙЫНСА ОБЩИНАЛАР ПАЛАТАҺЫНДА ФЕКЕР АЛЫШЫУҘАР. БЕВИНДЕҢ СЫҒЫШЫ

ЛОНДОН, 4 май. (ТАСС). Бөгөн сит ил эштәре министры Бевин, тышҡы политика мәсьәләләре буйынса ике көнгә иҫәп тотолған фекер алышыуҙарҙы асып, общиналар палатаһында телмәр менән сығыш яһаны.

Телмәр халыҡ-ара мөнәсәбәттәр мәсьәләләрендә Англия хөкүмәте тарафынан үткәрелә торған политиканы һөйләп биреүгә һәм аҡлауға арналды.

Мәскәү—Хабаровск—Мәскәү араһын өс көндә

Күп урынлы пассажир самолетының тиҙләтелгән осоуы

29 апрелдә Социалистик Хеҙмәт Геройы С. В. Ильюшин конструкцияһындағы күп урынлы «СССР—Л—1378» пассажир һауа экспресының Мәскәү—Хабаровск—Мәскәү трассаһында тиҙләтелгән осоуы тамамланды. Самолетты летчик И. Денисов алып барҙы.

«СССР—Л—1378» самолеты Внуковск аэродромынан 26 апрелдә төнгө сәғәт берҙә осоп китте. Экспресс ашығыс почта һәм ... алды. Хабаровскиға барып ... кәнгә тиклем уның менән ... аша өҙлекһеҙ бәйләнеш тотолды.

«СССР—Л—1378» самолеты ... апрелдә иртәнге 5 сәғәт 23 минутта Свердловскиҙа үтте. 8 сәғәттә ул Омск өҫтөнән үтте, ә сәғәт ярым ваҡыттан һуң Новосибирск аэропортына килеп төштө. Шул уҡ көндә самолет Иркутскиға килде.

«СССР—Л—1378» самолеты ... апрелдә иртә менән Хабаровскиға ҡарай юл алды. Һауа экспресы Мәскәүҙән алып Хабаровскиға тиклем юлды 20 сәғәтлек осош ваҡытында үтте.

«СССР—Л—1378» самолеты экипажы 9 сәғәт ял иткәндән һуң кабат Мәскәүгә ҡайтырға ... Ләкин, көслө ҡар ... күрә, график буйынса билдәләнгән ваҡытта осоп китә алмаы.

28 апрелдә Мәскәү ваҡыты ... 1 сәғәт 37 минутта самолет һауаға күтәрелде. Самолет ... таңдағы бөтә урындар ... Куриль утрауҙарынан һәм Владивостоктан килеүсе кешеләр ... тулы ине.

Ҡайтыу башлыса төнгө ваҡыттарҙа үтте. «СССР—Л—1378» самолеты юлда бер нисә тапҡыр ... менән ҡапланды.

Самолет ҡайтҡанда ла барған саҡта туҡталған аэропорттарҙа туҡталды.

Хабаровскиҙан Мәскәүгә тиклем булған бөтә юл метеорологик ауыр шарттарҙа үтте һәм ... ҡаршы осорға тура килде.

29 апрелдә «СССР—Л—1378» самолеты Мәскәүгә килеп ... һәм Внуковск аэродромына килеп төштө. Шулай итеп, самолет Хабаровскиҙан Мәскәүгә тиклем ҡайтыу юлын 24 сәғәт ваҡыт эсендә үтте.

Элек Мәскәүҙән Хабаровскиға тиклем осоу дүрт тәүлеккә ... ҡайтыу — өс тәүлеккә һуҙыла ине. «СССР—Л—1378» самолеты экипажы осоу ваҡытын ике ... тапҡырға кәметте. (ТАСС).

Донъя шахмат матч-турниры

Донъя шахмат матч-турнирының 19-сы турында, 4 майҙа, Ботвинник—Керес, Эйве—Решевский партиялары уйналып бөтмәй ҡалғайны. Союздар Йортоноң Октябрь залында, 5 майҙа, ошо партияларҙы һәм Решевский менән Ботвинниктең 18-се турҙа киҫектерелгән партияһы уйнап бөтелделәр.

Решевский, 47 йөрештән һуң Ботвинникка бирелергә мәжбүр булды. Ботвинник Керес менән булған уйынын да, 60 йөрештән һуң, отто. Эйве, уйнап торғайныса, Решевскийға бирелде.

Шулай итеп, матч-турнирҙа ҡатнашыусыларҙың һәр ҡайһы үҙ-ара дүртәр ҡат осрашып сыҡтылар. Инде һуңғы ҡат, бишенсе тапҡыр осрашыу ғына ҡала.

Матчтың лидеры — гроссмейстер Ботвинниктең—12 очкоһы бар. Ул үҙенә эйәреп килеүсе, 8,5 очколы, Решевский менән Смысловты 3,5 очкоға артта ҡалдыра. Гроссмейстер Керестең — ... донъяның элекке чемпионы Эйвенең 3,5 очкоһы бар.

Матч-турнирҙа үҙенә беренсе урынды тәьмин итеү өсөн Ботвинникка һуңғы ҡат осрашыуҙа ... очко алыу ҙа етә. Икенсе урынды алыу өсөн, күрәһең, Смыслов менән Решевский араһында ҡатмарлы көрәш булыр. (ТАСС).

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Рус драма театрында — «ТАРТЮФ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

«Октябрҙә» — «ӨСӨНСӨ УДАР».

«Садауатта» — «КОМСОМОЛЬСК».

Матросов исемендәге кинола — «ГВАРДИЯ РЯДОВОЙЫ АЛЕКСАНДР МАТРОСОВ».

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-46, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00736. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 91
8
май
шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөтә көс — яҙғы сәсеүҙең темпын һәм сифатын күтәреүгә! (1-се бит).

Подписчиктәр яңы заем облигациялары алалар. (1-се бит).

Б. Шнеер. — Тарихта халыҡ массаларының һәм айырым кешенең роле тураһында. (2-се бит).

Түймазы колхозсыларының гүзәл инициативаһы. (2-се бит).

«УРМАН АҘНАҺЫ». П. Положенцев. — Хеҙмәтсәндәрҙең һаулығы һәм урман. (3-сө бит).

В. Комаров. — Яҙғы бойҙайҙан юғары урожай алыу өсөн. (3-сө бит).

Ленин—Сталин комсомолының утыҙ йыллығы хөрмәтенә социалистик ярыш. (3-сө бит).

Фәйзи Бикбов. — Колхоздың алдынғылары. (3-сө бит).

ЭКЗАМЕНДӘР АЛДЫНАН. **П. Глухов.**—Уҡыусыларға һәм ата-әсәләргә берничә кәңәш. (4-се бит).

Ситиллдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Урман аҙнаһы

Илебеҙҙә яҙғы һәм йәйге эштәр осоро башланды. Республикабыҙ- [illegible]

[illegible]

...йәшелләндереүҙә яҡшы инициатива күрһәттеләр. Улар күп һанда ағастар ултырттылар, аллея һәм сәскә клумбалары үҫтерҙеләр. Эҫе йәй көндәрендә был бина янынан үтеп китеүе лә күңелле.

[illegible] ...йөҙ.

Баҫыуҙарыбыҙға ағас ултыртайыҡ, үҙебеҙҙең тыуған ҡалаларыбыҙҙы һәм ауылдарыбыҙҙы, үҙебеҙ йәшәй торған йорттарҙы йәшелләгә күмәйек.

Бөтә көс—яҙғы сәсеүҙең темпын һәм сифатын күтәреүгә!

Ярышып эшләйҙәр

Шаран районының Сталин һәм Фрунзе исемендәге колхоздары 1948 йылды юғары урожай үҫтереп алыу өсөн үҙ-ара ярышалар.

Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн тырышып эшләгән Сталин исемендәге колхоздың члендәре ,апрель айында уҡ баҫыу станларына күселәр. Ужымдарҙы аҙыҡландырыу планы арттырылып үтәлде, хәҙер 70 гектар ер һөрөлдө һәм 80 гектар майҙанда бойҙай сәселде. Орлоҡсолоҡ звеноһы үҙ участкаһында бойҙай сәсеүҙе тулыһынса тамамланы.

Фрунзе исемендәге колхозда ла эш уңышлы бара. Бында 60 гектар ужым тырматылды, 40 гектар борсаҡ, 20 гектар бойҙай сәселде. Ярыш дауам итә.

Алдынғы звенолар

ВОСКРЕСЕН. (Телефон аша). Районның бөтә колхоздарында баҫыу эштәре массовый рәүештә йәйелдерелде. «Новая жизнь», Сталин, Калинин, Киров, Куйбышев исемендәге колхоздарҙың һәр ҡайһыһында 20—30-ар гектар ер һөрөлдө, байтаҡ майҙан тырматылды һәм сәселде.

Юғары урожай үҫтереү буйынса йөкләмәләр алған звенолар, бригадалар баҫыуҙарҙа тырышып эшләйҙәр. «Ҡыҙыл яр» колхозында Тимерова һәм Мөхәмәтова иптәштәрҙең звенолары бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 18-әр центнер урожай алыу өсөн үҙ-ара ярышалар. Ике звено ла ужымдарҙы үҙ ваҡытында аҙыҡландырҙы һәм тырматты. Хәҙер ер һөрөү һәм бойҙай сәсеү эштәре алып барыла.

Үткән йыл районда иң юғары урожай алған «Алға» колхозының звеноводы Зәкиә Мөхәмәтова звеноһы быйыл да яҡшы эшләй. Хәҙер ужымдарҙы аҙыҡландырыу һәм тырматыуҙы тамамлағандан һуң, звено иртә культураларҙы тиҙерәк сәсеү өсөн саралар күрә.

Нормалар арттырылып үтәлә

Ҡалтасы районы Сталин исемендәге колхозда баҫыу эштәренең тәүге көндәренән бирле үҙ-ара ярышыусы һабансы Петр Каледин һәм Антон Найдин иптәштәр нормаһы арттырып үтәйҙәр. Хәҙер улар 3-әр гектар ер һөрҙөләр. Колхоздың башҡа һабансылары ла улар өлгөһөндә эшләп, хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ күтәрҙеләр. Һөҙөмтәлә был колхоз ер һөрөү эшендә районда алда бара.

«Ярыш», Крупская һәм Ворошилов исемендәге колхоздарҙа ла һөрөү эше киң йәйелдерелде, һөлө һәм бойҙай сәсеү ҙә башланды.

«Ҡалтасы», «Пахарь» һәм башҡа күп колхоздарҙа ужымдарҙы аҙыҡландырыу яҡшы ойошторолдо. «Сентель» колхозы планды 285 процентҡа үтәне.

Учалы районында орлоҡсолоҡ хужалығын яҡшыртыуға иғтибар итмәйҙәр

СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Колхоздарҙы үҙҙәренең сәсеү орлоҡтары менән тәьмин итеү тураһында» махсус ҡарары сығыуға бик күп ваҡыт үтте. Ләкин Учалы районы колхоздарында был мөһим ҡарарҙы тормошҡа ашырыу, орлоҡсолоҡ хужалығын яҡшыртыу буйынса ошо көнгә тиклем конкрет саралар күрелгәне юҡ әле. Йыл һайын орлоҡ етешмәй, йыл һайын государствонан бурысҡа орлоҡ алына. Колхоздар яҙғы осорҙа сәсеү үткәреү урынына, 100 километр алыҫлыҡтағы Магнитогорск һәм Миасс элеваторҙарынан орлоҡ ташырға мәжбүр булалар. Һөҙөмтәлә сәсеү сиктән тыш оҙаҡҡа һуҙыла, сәсеүлектәр өлгөрә алмай, йәшел ҡалалар һәм уларҙы иртә ҡырау ала. Үҙған йылда государство районға 12 мең центнер орлоҡ биреп ҙур ярҙам күрһәтте. Ул ваҡытта колхоз етәкселәре үҙҙәренең орлоҡсолоҡ хужалыҡтарын аяҡҡа баҫтырырға һүҙ бирҙеләр. Ләкин, сәсеү үтеү менән уҡ, был турала тағы оноттолар.

Бына быйыл тағы баҫыу эштәре башланды. Ә 55 колхоздың бары тик өсөһө генә — «Шишмә», «Авангард» һәм «Яңы юл» колхоздары ғына тулыһынса үҙ орлоҡтары менән тәьмин ителгәндәр. Ә ҡалған колхоздар быйыл да государствонан бурысҡа бик күп орлоҡ алдылар.

«Ҡыҙыл маяҡ» ауыл хужалығы артеле районда ҙур һәм перспективалы хужалыҡтарҙың береһе. Был колхозда быйыл 730 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культуралары сәселәсәк. Шуның күпселеген бойҙай культураһы тәшкил итә. Ә колхоздың үҙенең бары 100 центнер орлоғо бар.

Колхоз председателе иптәш Махмутов үҙе етәкселек иткән хужалыҡтың киләсәге тураһында бик аҙ уйлай. Орлоҡ участкаһына беркетелгән звенолар даими эшләмәйҙәр.

«Иманғол» колхозы председателе иптәш Ғәдиева лә иждивенселек настроениеһе бик көслө. Был колхозда ла үҙ орлоҡтарын булдырыу саралары күрелмәй.

Был хаталар быйыл да ҡабатланыуҙа дауам итә. Район ауыл хужалығы бүлегенең етәкселәре:

— Орлоҡсолоҡ хужалығы булдырыу тураһында колхоздарға күптән үк нисә күрһәтмәләр биргәйнек,—тиҙәр. Ләкин улар был күрһәтмәләрҙең нисек үтәлеүе, орлоҡсолоҡ звеноларының эштәрен яҡшыртыу буйынса колхоздарҙа ниндәй саралар күрелеүе тураһында бер нәмә лә әйтә алмайҙар, хатта улар бөгөнгә көндә колхоздарҙа күпме звено ойошторолоуын да белмәйҙәр. «Юшалы» колхозында ла ошо көнгә тиклем орлоҡсолоҡ звенолары ойошторолмаған.

— Ашлыҡтар үҫкәс, күҙ күрер әле. Ҡайһы участкала ашлыҡ уңһа, шуны тотормоҙ ҙа орлоҡ участкаһы итербеҙ, — тиҙәр колхоз етәкселәре.

Быйыл «Авангард», «Яңы юл» колхоздары районның сортлы орлоҡсолоҡ хужалығына әйләндереләсәктәр. Хатта бына был колхоздарҙа ла орлоҡтар тейешле кондицияға еткерелмәгән. Ябай орлоҡтар, сортлы орлоҡтарға алмаштырылмаған. Район ауыл хужалығы бүлеге был колхоздарҙың эшен яҡшыртыу буйынса практик саралар күрмәй.

М. Хәйҙәров.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Бөтә көс баҫыу эштәрен уңышлы үткәреүгә тупланды

Беҙҙең колхоз быйыл 210 гектар майҙанда иртә культуралар, 50 гектар майҙанда һуңғы культуралар сәсергә тейеш. Беҙ бөтә баҫыу эштәрен дә ике аҙна эсендә тулыһынса бөтөрөүҙе планлаштырҙыҡ. 195 гектар майҙанда тупта һөрөлгән еребеҙ булыу һәм 50 гектар майҙанды эшкәртеүгә МТС менән договор төҙәлеү беҙгә яҙғы баҫыу эштәренең срогын тағы ла ҡыҫҡартыуға тулы мөмкинлек бирә.

Баҫыу эштәрендә колхоздың 38 баш аты, 6 баш эш үгеҙе һәм тағәрмәсле бер тракторы файҙаланыла. Эш төрөнә ҡарап көндәлек һәм 5 көнлөк график төҙөлдө һәм һәр бер сәсеүсегә, һабансыға һәм тырмасыға конкрет задание бирелде. Мәҫәлән, график буйынса һабансылар көн һайын кәмендә 4,4 гектар ер һөрергә, сәсеүселәр 17,4 гектар ашлыҡ сәсергә тейештәр.

Эштең сифатына айырыуса иғтибар бирәбеҙ. Тракторҙар менән 22 сантиметрҙан да һай һөрөүгә, сей ҡалдырыуға юл ҡуймайбыҙ. Трактор һөргән участкала иң тәү культивация үткәрәбеҙ, 3 ҡат тырматабыҙ. Уннан һуң ғына ашлыҡ сәсәбеҙ.

Быйыл ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы киң файҙаландыҡ. Тырматыу алдынан ужым сәсеүлектәрен кәл һәм серегән тиреҫ менән ашланыҡ.

Үҙған йыл 42 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 25,23-әр центнер, ә айырым участкаларҙа унан да юғарыраҡ урожай алған өсөн колхоздың 24 стахановсыһы хөкүмәт ордендәре һәм медалдәре менән наградландылар. Ә быйыл беҙ бөтә майҙанда ла бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан кәмендә 120-шәр бот урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле **Н. Левкин**,
Маҡар районы «Восток» колхозы председателе.

Яҙғы сәсеүҙә районлар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 5 майына, проценттарҙа)

Тотҡан урыны. Районлар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән
1. Түймазы	7,4	15
2. Дүртөйлө	4,9	6,7
3. Ҡандра	4,2	10,5
4. Бүздәк	3,9	8,0
5. Илеш	3,6	6,1
6. Яҡауыл	3,5	3,2
7. Абзан	3,4	0,5
8. Кушнаренко	2,4	4,8
9. Стәрлетамаҡ	1,9	3,1
10. Саҡмағош	1,9	4,6
11. Благовар	1,4	4,2
12. Стәрлебаш	1,4	2,3
13. Шаран	1,4	3,0
14. Архангель	1,3	1,3
15. Әлшәй	1,3	4,7
16. Хәйбулла	1,3	4,4
17. Федоровка	1,2	1,3
18. Бөрө	1,0	1,9
19. Өфө	1,0	3,6
20. Бишбүләк	0,8	2,5
21. Көйөргәзе	0,7	1,3
22. Салауат	0,7	3,0
23. Баҡалы	0,6	—
24. Ҡырмыҫҡалы	0,6	1,6
25. Благовещен	0,6	0,8
26. Шишмә	0,6	1,6
27. Борай	0,5	—
28. Белорет	0,5	4,8
29. Мәләүез	0,5	1,1
30. Зианчура	0,5	1,5
31. Иглин	0,4	1,2
32. Белоҡатай	0,3	0,8
33. Маҡар	0,3	0,5
34. Бәләбәй	0,2	0,8
35. Мияҡә	0,2	2,1
36. Ауырғазы	0,1	1,7
37. Покровка	0,1	0,2
38. Ҡыйғы	—	2,6
39. Воскресен	—	0,6
40. Дәүләкән	—	0,5
41. Күгәрсен	—	0,2
42. Ғафури	—	0,1
43. Ҡариҙел	—	0,1

* * *

1948 йылдың 5 майына республика колхоздары 17,3 мең гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культуралары сәстеләр. Былтыр был ваҡытҡа 143,6 мең гектар майҙанда сәсеү үткәрелгәйне. Баҫыу эштәре әгәйҙәге йылда һуңлап башланды, әле булһа 20-нән артыҡ район сәсеүгә төшмәгән.

Иртә культураларҙы сәсеүҙең аҡрын барыуы яҙҙың һуңлап килеүе менән генә аңлатылмай, күп кенә район етәкселәре баҫыу эштәрен ойоштороуҙа ҡуҙғала алмаусылыҡ күрһәтәләр. Мәҫәлән, Бүздәк районы үткән биш көнлөктә 1314 гектар, Әлшәй районы 605 гектар ашлыҡ сәскәндә, уларға күрше булған Дәүләкән районында 5 майға бер генә гектар ҙа бөртөклө ашлыҡ культуралары сәселмәне.

Һауаның йылы һәм ҡоро булыуы сәсеү сроктарын ҡырҡа рәүештә ҡыҫҡартыуҙы талап итә. Тауге көндәрҙә булған етешһеҙлектәрҙе бик тиҙ бөтөрөргә һәм майҙың икенсе биш көнлегендә һәр бер районның, колхоздың сәсеү графиктарын теүәл үтәүҙәренә өлгәшергә кәрәк.

Подписчиктәр яңы заем облигациялары алалар

Республикабыҙ бөтә районларының үҙәк һаҡлыҡ кассалары, яңы заем взностарын шунда уҡ тулыһынса түләүсе подписчиктәргә заем облигацияларын таратыу өсөн, аванс алдылар. Был аванс республика күләмендә 43.580 мең һум тәшкил итә.

Яҡауыл районы колхозсылары заемға 1030 мең һумға яҙылып, 600 мең һум взносты шунда уҡ индерҙеләр. Истәк ауыл Советы (председателе иптәш Фәттәхов) игенселәре 73 мең һумлыҡ заемға яҙылып, уны шунда уҡ түләнеләр һәм заем облигацияларын да алдылар.

Был районның Мозжинск ауыл Советы (председателе иптәш Абдулисламов) хеҙмәтсәндәре 59 мең һумлыҡ заемға яҙылып, 55 мең һумын аҡсалата индерҙеләр һәм облигациялар алдылар.

Шулай уҡ «Бүй» колхозы (председателе иптәш Нуруллин), «Коммунар» колхозы (председателе иптәш Дәүләтшин) колхозсыларына аҡса взностары индергән суммаға заем облигациялары тапшырыла.

Заемға взностарҙы тулыһынса тамамлаған колхозсыларға облигациялар тапшырыу өсөн налог агенттәренә аванс биреү дауам итә.

Баймаҡ игенселәре яңы заемға 541 мең һумға яҙылдылар һәм 470 мең һум взнос индерҙеләр. Подписчиктәргә таратып биреү өсөн налог агенттәренә 450 мең һумлыҡ заем облигацияһы тапшырылды.

Заем взностарын шунда уҡ индереүсе колхозсыларға облигациялар тапшырыу һаҡлыҡ кассаларының, налог агенттәренең һәм заем буйынса уполномоченныйҙарҙың мөһим бурысы булып тора.

Станок-айға—мең метр тиҙлек

ОКТЯБРЬСК. Тиҙләтелгән метод менән бораулау мастеры Андрей Трипольский етәкселек иткән бригада ошо көндәрҙә 434-се номерле яңы скважинаны бораулай башланы.

Буровой көслө станок, 360 киловатт ҡеүәтендәге электромоторҙар менән хәрәкәткә килтерелә торған ике насос һәм башҡа иң яңы техника менән йыһазландырылған.

Быға саҡлы бораулауҙа станок-айға иң юғары тиҙлек 500—600 метр тәшкил итә ине, ә был яңы скважина станок-айға 1000 метр тиҙлек менән борауланасаҡ.




Шишмә районы «Алға» колхозы яҙғы сәсеү эшендә.

Һүрәттә: (һулдан уңға): Шишмә МТС-ы трактористы Н. Хәлитов, һабан таҙартыусы В. Рәжәпов һәм ашлыҡ сәсеүселәрҙән М. Вәлиев, Ф. Мөслимов иптәштәр.

В. Жданов фотоһы.

Тарихтә халыҡ массаларының һәм айырым кешенең роле тураһында*)

Б. ШНЕЕР

I. Тарихтә халыҡ массаларының роле

Тарихтә халыҡ массаларының һәм айырым кешенең роле тураһындағы мәсьәлә тик кешелек обществоһы үҫешенең ысын закондары асып һалынғас ҡына дөрөҫ рәүештә хәл ителде. Диалектик һәм тарихи материализмде тыуҙырыусылар Маркс һәм Энгельс кенә кешелек тарихендә халыҡ массаларының ролен, шулай уҡ айырым кешенең ролен дөрөҫ рәүештә билдәләй белделәр.

Марксҡа һәм Энгельсҡа тиклем, тарихҡа идеалистик ҡараш өҫтөнлөк итеп килде. Хатта материалист-философтар ҙа обществоны аңлауҙа идеалист булдылар. Мәҫәлән, XVIII быуат аҙағындағы француз материалистәре тарихтә төп көс итеп күренекле кешеләрҙе — королдәрҙе, полководецтарҙы, бөйөк ғалимдәрҙе һәм башҡаларҙы иҫәпләнеләр.

Марксҡа һәм Энгельсҡа тиклем бер кем дә халыҡ массаларының тарихтағы ролен баһалай белмәне. Ер йөҙөндә ысын мәғәнәһе менән бөтә материаль һәм рухани байлыҡтарҙы тыуҙырыусы булып торған халыҡҡа, был бөтә ысынлығы менән тарихте ижад итеүсегә, буржуазия идеологтары һуҡыр һәм булдыҡһыҙ толпа итеп ҡаранылар. «Геройҙар», йәнәһе, был толпаны теләһә ҡайҙа алып бара алалар. Улар халыҡ массаларын һанға һуҡмай һәм хатта нәфрәт менән ҡаранылар. Вальтер «халыҡ һәр ваҡытта тупаҫ һәм аңһыҙ; ул егеп йөрөтәлә торған үгеҙ, уға ҡамыт, ҡыуалаусы һәм аҙыҡ кәрәк» тип яҙҙы. XIX быуаттың буржуаз ғалиме Томас Карлейль, бөтә донъя тарихе — ул тик бөйөк кешеләр тарихе, ә халыҡ массалары һәр төрлө үҙ аллына йәшәүҙән мәхрүмдәр, тип яҙҙы.

Тарихҡа ошондай ҡараш йәшәгәндә, билдәле, кешелек обществоһы үҫешенең һис бер төрлә объектив закондары тураһында һөйләп торорға ла тура килмәй. Бөтә нәмә субъекттың, йәғни күренекле кешенең ирке, хәрәкәттәре һәм хатта көйһеҙләнеүе менән билдәләнелә. Тимәк, субъект тарихи үҫештең хәл иткес көсө итеп белдерелә. Ошондай ҡараштар социологияла, йәғни обществоны өйрәнеү фәнендә, субъектив метод исемен алдылар. Субъективизмға ҡапма-ҡаршы рәүештә, марксизм кешелек обществоһы үҫешенең ысын нигеҙен асып һалды. Маркс һәм Энгельс материаль кәрәк-яраҡтарҙы етештереп сығарыу юлы, йәғни етештереүсе көстәр һәм етештереү мөнәсәбәттәре общество үҫешенең хәл иткес нигеҙе булып торғанлығын күрһәттеләр. Етештереү ысулының үҙгәреүе менән, һуңғы иҫәптә, общество тормошоноң бөтә яҡтары—политик ҡоролош һәм мораль, фән, искусство, дин, философия һәм башҡалар кеүек бөтә идеологик надстройка үҙгәрә.

Общество үҫешенең тәбиғи-тарихи процесс, билдәле, тарихтә халыҡ массаларының хәл иткес ролдәренән ситтә булыуы мөмкин түгел. Хеҙмәтсе массалар, йәғни, материаль кәрәк-яраҡтарҙы туранан-тура етештереп сығарыусылар, обществоның төп етештереүсе көсө булып торалар. Тимәк, етештереүсе көстәрҙең һәм етештереү мөнәсәбәттәренең тарихе—халыҡ массаларының тарихе лә.

Иптәш Сталин «Диалектик һәм тарихи материализм тураһында» тигән гениаль хеҙмәтендә тарих фәненең бурыстарын классик рәүештә аңлатып бирҙе. Үҙенең был хеҙмәтендә иптәш Сталин былай тип яҙҙы:

«Был, общество үҫешенең тарихе — ул, бөтәһенән дә элек етештереү үҫешенең тарихе, етештереүҙең быуаттар буйына бер-береһен алмаштыра килеүсе ысулдары тарихе, етештереү көстәре һәм кешеләрҙең етештереү мөнәсәбәттәре үҫешенең тарихе, тигән һүҙ.

Тимәк, общественный үҫеш тарихе — шуның менән бергә, материаль байлыҡтарҙы етештереүселәрҙең үҙҙәренең тарихе, етештереү процесының төп көстәре булып тороусы һәм обществоның йәшәүе өсөн кәрәкле материаль байлыҡтар етештереүҙе бойомға ашырыусы хеҙмәтсәндәр массаларының тарихе ул.

Тимәк, тарих фәне, әгәр ҙә ул ысын фән булырға теләй икән, бынан ары общественный үҫештең тарихен королдәрҙең һәм полководецтарҙың эш итеүҙәренә, государстволарҙы «яулап алыусыларҙың» һәм «буйһондороусыларҙың» эш итеүҙәренә ҡайтарып ҡалдыра алмай, ә бөтәһенән дә элек, материаль байлыҡтарҙы етештереүселәрҙең тарихе менән, хеҙмәтсән массаларҙың тарихе менән, халыҡтар тарихе менән шөғөлләнергә тейеш». (ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсы, 116-сы бит).

Бына ни өсөн, ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсы сыҡҡанға тиклем партия тарихе буйынса булған беҙҙең дәреслектәребеҙ беҙҙең партиябыҙҙың тарихендәге һәр бер этаптың политик һәм экономик обстановкаһына характеристика бирмәгән, большевистик партияның теория мәсьәләләрен тәрән рәүештә яҡтыртмаған ваҡытта, улар, партия тарихе — ул, хәрәкәттә булыусы марксизм-ленинизм икәнен күрһәтмәгән, ә күбеһенсә айырым деятелдәрҙең хәрәкәттәрен — уларҙың нисә тапҡыр һәргендән һәм төрмәләрҙән ҡасҡанлыҡтарын яҙып күрһәткән ваҡытта, ул, ундай рәүештә яҡтыртыу яртылаш эсәрлек ине. Сөнки партия тарихе халыҡтар тарихенән, объектив ысынбарлыҡтан айырыла, ә айырым кешеләрҙең генә хәрәкәттәренә ҡайтып ҡала ине. Беҙҙең партиябыҙҙың Үҙәк Комитете «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсы баҫылып сығыу менән бәйләнештә партия пропагандаһының ҡуйылышы тураһында» 1938 йыл 14 ноябрҙә булған тарихи ҡарарында тарихте ундай рәүештә яҡтыртыуҙы ғәйепләне.

ВКП(б) тарихенең сталинсе ҡыҫҡаса курсы беҙҙең партиябыҙҙың тарихен фәнни рәүештә яҡтыртыу өлгөһө булып тора. Унда беҙҙең большевиктар партияһының тарихе СССР халыҡтары тарихенән айырып алғыһыҙ бәйләнештә бирелгән.

Марксизм-ленинизм тарихтә халыҡ массаларының ысын ролен күрһәтте.

Синфи формацияларҙағы синфи көрәш үҫештең төп хәрәкәт иттереүсе көсө булып тора. Ҡолдар революцияһы ҡол биләүселек формацияһына сик ҡуйҙы. Крепостной крәҫтиәндәр революцияһы крепостниктарҙы бөтөрҙө һәм крепостниклек формаһында эксплоатациялауҙы бөтөрҙө.

Социалистик революция халыҡтың иң киң массаларын актив көрәшкә күтәрә. Ул, һәр төрлө эксплоатацияны бөтөрөүҙе һәм бөтә, һәр төрлө эксплоататорҙарҙы һәм йәберләүселәрҙе бөтөрөүҙе үҙ маҡсаты итеп ҡуйыуы менән бөтә элекке революцияларҙан айырыла. Әгәр ҙә партия үҙенең эшендә миллионлаған хеҙмәтсәндәр массаларына таянмаған булһа һәм уларҙы үҙ артынан алып бармаған булһа, бөтә беҙҙең еңеүҙәребеҙ мөмкин булмаҫ ине. Большевиктар партияһының көсө — уның массалар менән айырылғыһыҙ бәйләнешендә. Иптәш Сталин үҙенең тарихи сығыштарында тарихтә халыҡ массаларының хәл иткес ролен күп тапҡырҙар ыҡлап күрһәтеп үтте. Колхозсы ударниктарҙың I Бөтә Союз съезында иптәш Сталин былай тине: «Халыҡтарҙың һәм государстволарҙың яҙмышы хәҙер юлбашсылар тарафынан ғына түгел, бәлки, бөтәһенән дә элек һәм бигерәк тә, хеҙмәтсәндәрҙең миллионлаған массалары тарафынан хәл ителә. Тауышһыҙ һәм шаушыуһыҙ заводтар һәм фабрикалар, тимер юлдар, колхоздар һәм совхоздар төҙөүсе, тормоштоң бөтә байлыҡтарын булдырыусы, бөтә донъяны туйындырыусы һәм кейендереүсе эшселәр һәм крәҫтиәндәр, — яңы тормоштоң геройҙары һәм ижад итеүселәре бына кемдәр».

Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә бөйөк совет халҡы беҙҙең илебеҙҙә нигеҙҙә социалистик общество төҙөнө. Совет кешеләренең фидакәр хеҙмәттәре сталинсе биш йыллыҡтарҙың уңышлы үтәлешен тәьмин итте. Ҡаты һуғыштарҙа совет халҡы кешелектең иң яуыз дошмандарын — герман фашистәрен һәм япон империалистәрен тар-мар итте. Хәҙер беҙ социализм төҙөүҙе тамамлау һәм социализмдән аҡрынлап коммунизмға күсеү осоронда йәшәйбеҙ. Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре, йәнле ижади совет патриотизмы тойғоһо менән алға барған хәлдә, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә үҙҙәренең бөтә көстәрен бирәләр. Илебеҙҙең халыҡ хужалығының бик күп төрлө тармаҡтарында совет кешеләре яңынан-яңы хеҙмәт подвигтәре күрһәтәләр. Айырым эшселәр йыллыҡ пландарҙы һәм тотошо менән биш йыллыҡ планды срогынан элек үтәргә йөкләмә алалар. Миллионлаған совет кешеләренең ижади хеҙмәттәре — сталинсе биш йыллыҡ планды тулыһынса һәм срогынан элек үтәүҙең залогы.

Иптәш Сталин бөтә беҙҙең работниктарҙы, массаларҙы өйрәтеү генә түгел, бәлки массаларҙан өйрәнергә лә кәрәк тип өйрәтә. «Етәкселәр киләләр һәм китәләр, ә халыҡ ҡала. Тик халыҡ ҡына үлемһеҙ. Ҡалған бөтәһе — ваҡытлы. Шуға күрә халыҡ ышаныһын ҡәҙерләй белергә кәрәк».

Тарихтә халыҡ массаларының хәл иткес ролдәре тураһындағы учение беҙҙең партиябыҙҙың практик эше өсөн айырыуса әһәмиәтле. Ленин, беҙҙең партиябыҙ халыҡ аңлағанды дөрөҫ сағылдырырға тейеш, тип әйткәйне. Беҙҙең партиябыҙ үҙенең эшендә халыҡтың төп интерестәрен дөрөҫ һәм тулыһынса сағылдырырға тейеш. Был учение, партия һәм синыф араһында, партиялылыҡ, партияһыҙ хеҙмәтсәндәр араһында үҙ-ара дөрөҫ мөнәсәбәт урынлаштырыу эшендә айырыуса әһәмиәт тота. Ленин һәм Сталин: коммунистар партияһы массаларҙан ситтә тормаҫҡа тейештәр, партия массаларҙың тауышына ныҡ ҡолаҡ һалырға тейеш. Ул массаларҙың көрәш практикаһын өйрәнергә һәм шунда үҙ политикаһының дөрөҫлөгөн тикшерергә тейеш, ул массаларҙы өйрәтергә генә түгел, бәлки уларҙан өйрәнергә лә тейеш, тип өйрәтәләр. Партия үҙ синыфының етәксеһе, юлбашсыһы, учителе булырға тейеш.

Беҙҙең партиябыҙ, тарихтә халыҡ массаларының хәл иткес ролдәре тураһында тарихи материализм учениеһенән партияның массалар менән бәйләнеше уның йәшәүенең һәм үҫеүенең иң мөһим законы булып торғанлығы тураһында һығымта яһаны. Бына шуға күрә лә партияның массалар менән бәйләнешенең айырыуса әһәмиәтен партиябыҙ һәр ваҡыт ап-асыҡ күрһәтә килә. Иптәш Сталин:

«Большевиктар халыҡтың иң киң массалары менән бәйләнеште һаҡлағаң ваҡытта, уларҙың еңелмәҫлек буласаҡтарын ҡағиҙә рәүешендә танырға мөмкин. Һәм, киреһенсә, большевиктарҙың һәр төрлө көстән мәхрүм булыуҙары һәм буш нәмәгә әүерелеүҙәре өсөн уларҙың массаларҙан айырылыуҙары, һәм улар менән бәйләнеште юғалтыуҙары, бюрократлыҡ тутығы менән ҡапланыуҙары етә» тип яҙҙы.

Беҙҙең большевиктар партияһының Уставы, массалар менән көн һайын бәйләнеш — коммунистең төп бурыстарының береһе тип күрһәтә. Партия членына ҡарата булған был талап, тарихи материализмдең тарихтә халыҡ массаларының хәл иткес ролдәре тураһындағы учениеһенән туранан-тура логик һығымта булып тора.

II. Тарихтә бөйөк кешеләрҙең роле

Халыҡ массаларының хәл иткес ролдәрен таныу, общество үҫешенең объектив закондарын таныу тарихтә айырым кешеләрҙең ролдәрен һис бер хәлдә инкар итеү тигән һүҙ түгел. Буржуаз фәндә был мәсьәлә буйынса ике сикка килеп бәрелеү йәшәп килә. Буржуаз ғалимдәр, күренекле кешеләрҙең (личностәрҙең) хәрәкәттәрен йәки общество үҫешенең төп хәрәкәт иттереүсе көсө итеп таныйҙар, йәки кешеләрҙең эшмәкәрлектәрен нулгә тиңләп һәм кешене һуҡыр кәрәклек ҡоралы рәүешендә, яҙмыш ҡоралы рәүешендә ҡарап, тарихтә айырым кешенең ролен бөтөнләй инкар итәләр.

Марксизм-ленинизм тарихтә айырым кешенең роле тураһындағы мәсьәләлә был хата ҡараштарҙың икәүһен дә фаш итте. Марксизм, йәнәһе, күренекле кешеләрҙең ролдәрен инкар итә тип раҫларға маташыу уға яла яғыу булып тора. Киреһенсә, тап бына марксизм бөйөк кешеләрҙең ысын ролдәрен күрһәтте. Тарихи материализм тарихте кешеләр яһағанлығын ныҡлап күрһәтә. Ләкин улар уны нисек яһайҙар? Мәсьәләнең асылы шунда тора. Бөйөк кешеләр, баштарына нәмә килһә шулай итеп теләгәнсә тарихте ижад итә алалармы? Әлбиттә, юҡ. Тарих теләһә нисек эшләнмәй. Бөйөк кеше (личность) кешелек обществоһы үҫешенең объектив закондары менән иҫәпләшмәйенсә булдыра алмай. Кем дә кем ошо закондарға ҡаршы барырға маташа икән, ул ҡотолғоһоҙ рәүештә көлкө хәлгә ҡала бара.

Иптәш Сталиндең 1931 йылда немец яҙыусыһы Эмиль Людвиг менән булған беседаһында беҙ тарихтә айырым кешенең роле тураһындағы мәсьәләгә ҡарата классик рәүештә бирелгән характеристиканы күрәбеҙ. Людвиг: «Марксизм тарихтә айырым кешенең күренекле ролен инкар итә. Тарихте материалистик аңлау менән һәм һеҙҙең шулай ҙа күренекле кешеләрҙең тарихи ролдәрен таныуы[illegible]

[illegible]

...ныфтар түгел, ә бәлки тик айырым күренекле кешеләр генә яһайҙар. Тарихи үҫеште ошолай аңлау народниктарҙы логик рәүештә индивидуаль террор тактикаһына алып килде. Был террорлыҡ тактикаһы политик яҡтан тәрән рәүештә зарарлы ине, сөнки ул пролетариаттың политик партияһын булдырыуға ҡомасаулыҡ итеп килде.

Народниктар тарафынан мәсьәләнең ҡуйылышы үҙе үк характерле. Мәҫәлән, Россияла капитализм үҫергә тейешме, тип ҡуйыла. Әйтерһең, Россияла капитализмдең үҫеүе народниктарҙың был мәсьәлә буйынса ниндәй ҡарарға килеүҙәренә бәйләнгән. Шулай итеп, народниктар үҙҙәрен геройҙар, тарих яһаусылар итеп хис иттеләр. Улар тарихи үҫеш тәгәрмәсен артҡа табан әйләндерергә маташтылар һәм еңелеүгә осранылар. Был тәбиғи, сөнки ул саҡта инде Россия капиталистик үҫеш юлына баҫҡайны һәм уңы был юлдан борол ебәрерлек көс тә юҡ ине. Тимәк, бурыс капитализмдең үҫешенә тотҡарлыҡ итеүҙә түгел (был бары бер мөмкин түгел), ә капитализмдең үҙенең үҫешенән килеп тыуған ҡеүәтле революцион көскә — эшселәр синыфына таяныуҙа, уға ойошоуға ярҙам итеүҙә, уға үҙенең политик партияһын булдырыуға ярҙам итеүҙә һәм ошоноң менән самодержавиеға һәм капитализмға ҡаршы еңеүле көрәште тәьмин итеүҙә тора.

Нәмә тигән һүҙ һуң ул бөйөк кеше? Ул обществоның үҫеш закондарын башҡаларға ҡарағанда тәрәнерәк аңлай, башҡаларға ҡарағанда алыҫыраҡ күрә белә, көслө ихтыярлы һәм үҙенең бөтә сифаттары менән обществоның алдынғы көстәренең ихтыярын үтәргә һәләтле кеше. Тап бына шуға күрә лә ундай кеше тотош синыф тарафынан яҡлана, ул билдәле синыфтың йәки киң халыҡ массаларының юлбашсыһы булып баҫа. Нәмәлә һуң, тимәк, бөйөк кешенең көсө? Уның көсө — тотош синыфтың, киң халыҡ массаларының [illegible]

[illegible] Керенскийҙең булыуы Россияның үсеш барышынан килеп сыға торған кәрәклектән түгел ине. Ләкин был фактылар, уларҙың аҙ һанда булыуына ҡарамаҫтан, революцияның үсеүен тиҙләтеү мәғәнәһендә ваҡиғалар барышына бер ни тиклем тәьҫир иттеләр.

Табиғи, Николай Романов йәки Керенский урынында бүтән көслөрәк личность булған хәлдә лә көрәштең һөҙөмтәһе буржуазия файҙаһына булмаҫ ине, тик пролетариаттан үҙ көсөн күберәк һалыуҙы ғына талап итер ине. Беҙ быны тарихи кәрәклектән килеп сыға тип беләбеҙ.

Буржуаз идеологтар марксизмдең теорияһы һәм практикаһы араһында ҡапма-ҡаршылыҡ табырға маташтылар, улар, йәнәһе, марксизм теорияла обществоның үсешендә субъектив фактылар ролен инкар итә, ә ғәмәлдә был факторға ҙур әһәмиәт бирә, тип иҫбат итергә маташтылар.

Тарихи кәрәклек кешеләрҙе һис тә хәрәкәтһеҙ ҡалыуға дусар итмәй. Уны кешеләрҙең эшмәкәрлегенә ҡапма-ҡаршы ҡуйырға ярамай. Капитализмдең үлеме тарихи яҡтан ҡотолғоһоҙ икән, ул саҡта пролетариат революцияһы кәрәкмәй тип ҡарау, был — капитализмдең үлеме ни өсөн ҡотолғоһоҙ булыуын аңламау тигән һүҙ. Капитализмдең үлеме ҡотолғоһоҙ булыуы тап бына уның эшселәр синыфы менән килешә алмағанлығы һәм эшселәр синыфының обществоны революцион ҡайтанан ҡороу өсөн көрәш юлына ҡотолғоһоҙ баҫыуы менән аңлатыла.

Беҙҙең көндәрҙә булып үткән ваҡиғалар үҙҙәре үк буржуаз идеологтарҙың кәрәклекте кешеләрҙең ролдәренә ҡапма-ҡаршы ҡуйырға маташыуҙарын юҡҡа сығарҙылар. Быны беҙ Советтар Союзының еңеүле рәүештә тамамланған Ватан һуғышы миҫалында күрәбеҙ. Совет халҡының героик көрәше Гитлер Германияһы өҫтөнән беҙҙең һис шикһеҙ рәүештә еңеүебеҙҙе билдәләүсе шарттар иҫәбенә инде. Иптәш Сталиндең гениаль етәкселеге аҫтында еңеүебеҙ ҡаты һуғыштарҙа яулап алынды. Иптәш Сталиндең етәкселеге үҙе үк еңеүҙең кәрәкле шарты булды. Шулай итеп, кәрәклекте кешеләрҙең роленә, личностең роленә ҡапма-ҡаршы ҡуйырға ярамай. Беҙҙең еңеүебеҙҙең һис шикһеҙ булыуын аңлау Тыуған илебеҙҙең дошмандарына ҡаршы көрәштә беҙҙең энергиябыҙҙы унлата арттырҙы.

Стихиялылыҡ теорияһын маҡтаусы, пролетариат өсөн боевой политик партия кәрәклеген, юлбашсыларҙың ролен инкар итеүсе экономистарға ҡаршы Ленин аяуһыҙ көрәш алып барҙы. Экономистар, „стихиялы көрәш барышы үҙе үк пролетариатты социализмға алып килер", тигән фекерҙе алға һөрҙөләр. Экономизм менән көрәштә Ленин партияның ролен, етәкселәрҙең, юлбашсыларҙың ролен айырыуса көс менән күрһәтте. Маркс, Энгельс, Ленин һәм Сталин кеүек бөйөк политик юлбашсыларһыҙ эшселәр синыфы еңә алмаҫ ине, беҙҙең революциябыҙ еңә алмаҫ ине тип әйтергә мөмкин.

III. Маркс—Энгельс—Ленин—Сталин—эшселәр синыфының юлбашсылары

Марксты, Энгельсте, Ленинде һәм Сталинде үткән замандың ниндәй генә булмаһын тарихи деятелдәре менән тиңләштерергә мөмкин түгел. Был юлбашсылар, тарихтә иң прогрессив синыфтың — пролетариаттың интерестәрен сағылдырыусы юлбашсылар, донъяның бөтә халыҡтарының төп интерестәрен сағылдырыусы юлбашсылар. Был юлбашсылар үҙҙәрендә ғәйәт ҙур теоретик көрәште революцион көрәштең бик ҙур тәжрибәһе менән дөрөҫ рәүештә бергә ҡуша белеүсе яңы типтағы юлбашсылар. Ленинде Петр I менән тиңләштерергә мөмкинме, тигән һорауға иптәш Сталин, әгәр ҙә ундай тиңләштереүҙе яһарға икән, ул сағында Петр I диңгеҙҙә бер тамсы, ә Ленин тотош океан, тип яуап бирҙе. Пролетариат юлбашсыларының бөйөклегө — пролетариат революцияһының бөйөклегө ул. Уларҙың көсө — кешенең кеше тарафынан һәр төрлө эксплоатацияланыуын бөтөрөүҙе үҙ бурысы итеп ҡуйыусы социалистик революцияның көсө ул. Маркстың һәм Энгельстең ҡеүәтле көсө — уларҙың пролетариат идеологтары булыуҙарында. Улар тар кабинет ғалимдәре түгел, ә эшселәр хәрәкәтенең юлбашсылары булдылар. Улар теорияны тик революцион юл менән капитализмде ҡолатыу өсөн һәм социалистик общество төҙөү өсөн уңышлы көрәште тәьмин итеүсе сара итеп ҡаранылар. Ленин һәм Сталин, Маркс менән Энгельс кеүек үк, бөтә прогрессив кешелектең юлбашсылары булып торалар. Улар үҙҙәренең гениаль аҡылдарының бөтә ҡеүәтлелеген халыҡҡа хеҙмәт итеүгә, революцияны әҙерләүгә бирҙеләр.

Ленин һәм Сталин образдарын беҙҙең большевиктар партияһы тарихенән айырым, халыҡтан айырым уйлау мөмкин түгел. Лениндең һәм Сталиндең бөтә тормошо һәм эше беҙҙең илебеҙ халыҡтарының үҙ намыҫы, азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн героик көрәштәре менән айырып алғыһыҙ рәүештә бәйләнгән.

Шулай итеп, беҙ тарихтә халыҡ массаларының һәм айырым кешеләрҙең роле тураһында марксизм-ленинизм учениеһе беҙҙең большевиктар партияһының эше өсөн бик ҙур практик әһәмиәт тотҡанлығын күрәбеҙ. Ул һәр бер коммунисте массалар араһында арыуһыҙ эш алып барырға, уларҙың аңдарын күтәрергә, уларҙы коммунистик рухта тәрбиәләргә бурыслы итә. Коммунистар юлбашлап барыусы һәм етәксе ролен үтәп, алғы сафта торорға бурыслылар. Был талаптарҙы практик рәүештә үтәү беҙгә, социализм төҙөүҙе тамамлау һәм социализмдән аҡрынлап коммунизмға күсеү эшендә уңыштар тәьмин итә.

*) Марксизм-ленинизм кискә университетында уҡылған лекцияның ҡыҫҡартылған стенограммаһы.

Туймазы колхозсыларының гүзәл инициативаһы

Партия һәм хөкүмәт Бөйөк Ватан һуғышы фронттарында һәләк булыусы воиндарҙың семьялары, инвалидтар, йәтим балалар, ҡарттар тураһында ҙур хәстәрлек күрәләр. Государство уларға пенсия һәм пособия түләү өсөн йыл һайын бик күп суммала аҡса тота.

Шуның менән бергә колхоздарҙағы общественный үҙ-ара ярҙам кассалары ла һәләк булыусы воиндарҙың семьяларына, Ватан һуғышы инвалидтарына, йәтим балаларға ярҙам итеүҙә бик мөһим сығанаҡ була алалар. Туймазы районының «Балағас күл», «Яҡты шишмә» һәм Туҡаев исемендәге колхоздары үҙ-ара ярҙам кассалары ойоштороп, бик яҡшы инициатива күрһәттеләр. Хеҙмәткә яраҡлы бөтә колхозсылар ҙа был кассаларға член булып инделәр һәм, ауыл хужалығы артеле Уставының 11-се статьяһындағы «в» пунктына ярашлы рәүештә, кассаның материаль базаһын нығыттылар.

Туҡаев исемендәге колхозда үҙ-ара ярҙам кассаһының быйылғы доходы 22 мең 659 һум аҡсанан, 67 центнер игендән һәм башҡаларҙан тора. Уҙған йыл касса тарафынан мохтаж семьяларға, йәтим балаларға һәм ҡарттарға 10 мең 117 һум аҡсалата ярҙам күрһәтелде, бынан башҡа 60 центнерҙан артыҡ иген, һәм 8500 һумлыҡ ссуда бирелде. Колхоз кассаның средствоһына 8 йәтим бала һәм ҡараусылары булмаған ҡарттарҙан 18 кешене аҫырай. Һуғышта һәләк булыусы воиндарҙың семьяларынан ике кешегә яңы йорт һалынды, өс семьяның өйөнә капиталь ремонт, 35 семьяның өйөнә ағымдағы ремонт үткәрелде, бер семьяға һыйыр һатып алып бирелде һәм 29 йәтим бала өҫ-баш кейемдәре менән тәьмин ителде. «Балағас күл» һәм «Яҡты шишмә» колхоздарындағы үҙ-ара ярҙам кассалары ла шундай уҡ эштәр башҡарҙылар.

Был артелдәрҙең члендәре һәләк булған воиндарҙың семьяларына, Ватан һуғышы инвалидтарына, йәтим балаларға һәм ҡарт колхозсыларға тейешле ярҙам күрһәтеү өсөн республикабыҙҙың бөтә колхоздарында ла үҙ-ара ярҙам кассалары ойошторорға һәм ул кассаларҙа ныҡлы материаль база булдырырға саҡырып Башҡортостандағы бөтә колхозсыларға мөрәжәғәт иттеләр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы үҙенең махсус ҡарары менән уларҙың был гүзәл инициативаһын хупланы һәм район Советы исполкомдарын был мөрәжәғәтте районның бөтә колхоздарында өйрәнеүҙе ойошторорға, һәр бер колхозда үҙ-ара ярҙам кассаларын нығытыуға йүнәлтелгән практик саралар билдәләргә тәҡдим итте.

„Урман аҙнаһы"

Хеҙмәтсәндәрҙең һаулығы һәм урман

Ағас ултыртыуға, урамдарҙы, баҡсаларҙы, юлдарҙы йәшелләндереүгә бирелгән иғтибар башҡа бер генә илдә лә юҡ, тик беҙҙең СССР-ҙа ғына был эшкә ҙур әһәмиәт ителә. Бигерәк тә Ватан һуғышынан һуң кешеләрҙең көнкүреш шарттарын артабан яҡшыртыуға, йәшәгән ҡалаларыбыҙҙы, ауылдарыбыҙҙы матурлауға йүнәлдерелгән саралар бик мөһимдәр.

Урман — хужалыҡтың тәрәге, илдең байлығы, ҡоролоҡтоң дошманы, ер эшсенең, һунарсының дуҫы ғына түгел, ә һаулыҡтың бөйөк дуҫы, шатлыҡ та, илһам да ул. Совет халҡы йәшәүҙең тәмен белә һәм күп йылдар йәшәргә теләй.

Йәшеллек туранан-тура һәм ситләтеп булһа ла кешенең гүмерен оҙайта, улай ғына ла түгел, йәшеллек ер өҫтөндәге бөтә нәмәне сереүҙәрҙән, туҙыуҙарҙан һәм башҡаларҙан һаҡлай. Һауа һәр ваҡытта төрлө зарарлы газдар менән тулы, һәм ул газдар бигерәк тә заводтар эшләгән урындарҙа күп булалар. Мәҫәлән, тәжрибәләрҙең һәм профессор М. Е. Ткаченко әйтеүе буйынса, промышленность ҡалаһы үҙәгендә металл конструкцияларҙы үҙҙәренең ҡаршылыҡ күрһәтеү көсөн 40 йылдан һуң, тәтенлә урындарҙа хатта 20—30 йылдан һуң уҡ юғалта, ә ниҙе ауыл ерҙәрендә тетеҙләр, газдар булмай торған урындарҙа был ваҡыт 250 йылға тиклем етә. Заводтарҙан сыҡҡан газдар (көкертлә, азот әсетмәһе, хлор) тәьҫирендә, капиталистик илдәрҙә, промышленность ҡалаларындағы порттар, тәҙәлештәрендә йәшеллек булған ергә ҡарағанда, бик тиҙ емерелеүсән булалар. Төтөн туҙандары ер өҫтөнә төшкән ҡояш нурҙарын тотоп ҡына ҡалмайҙар, ә, киреһенсә, уның сифатын кәметәләр, һаулыҡ өсөн әһәмиәте бик ҙур булған ультрафиолетовый нурҙарҙы тотоп алып ҡалалар. Шуның өсөн эре ҡалаларҙа һауаларҙың таҙа булмауы арҡаһында кешеләр рахит, туберкулез менән ауырыйҙар.

Хәҙерге ваҡытта беҙҙең илебеҙҙә эшселәрҙең заводтағы эш һәм көн-күреш шарттары яҡшыра барһа ла, тәбиғәттең, урмандың һаулыҡ өсөн ниндәй әһәмиәте барлығын һәр кеше белергә тейеш.

Ағастарҙың кешеләр һаулығына тәьҫир итеүҙәре нәмәнән тора һуң? Улар һауаның сафлығын арттыралар, озонлайҙар, һауаны иҫә хуш еҫле смолалы парҙар менән тултыралар. Профессор Токиндең өйрәтеүе буйынса, улар бактерияларҙы үлтерә торған фитонцидлыҡ үҙенсәлектәргә эйә булмайынса мөмкин түгелдәр. Ағастар туҙандарҙы, газдарҙы үҙҙәренең япраҡтарында тотоп алып ҡалалар һәм уникәлерҙе төрлө сирҙән һаҡлайҙар. Кеше өсөн зарарлы булған нәмәләрҙе бындай урындарҙа ағас үҙенә ала, шуның өсөн дә ҡалала үҫкән ағастарҙың ғүмере, урманда үҫкәндәгеләргә ҡарағанда, ике тапҡыр ҡыҫҡараҡ була. Төтөндәрҙән һәм газдарҙан бигерәк тә сәнескеле ағастар һәләк булалар.

Ағаслыҡтар кеше һаулығын һаҡлауҙа бик ҙур роль уйнайҙар. Йәй көндәрендә урманда һалҡынса, ә ҡыш көнө йылы була. Ағастар беҙҙең тәнебеҙҙе ҡояш ҡыҙырыуынан һаҡлайҙар.

Партия һәм Совет Хөкүмәте кешеләрҙең һаулығын һаҡлау тураһында көндән-көн хәстәрлек күрә. Ҡалаларҙы йәшелләндереү, ағастар ултыртыу һаулыҡ һаҡлау эшенә ярҙам итәсәк һәм беҙҙең йәшәгән ерҙәребеҙҙе матурлаясаҡ. Шуның өсөн дә йәшеллектәр ултыртыу һәр бер кешенең ҡаҙаттаге бурысы булып тора.

Профессор П. Положенцев.

Яҙғы бойҙайҙан юғары урожай алыу өсөн

Башҡортостанда һуғышҡа тиклемге йылдарҙа сәсеү майҙаны ағынан яҙғы бойҙай башҡа бөртөклө ашлыҡ культуралары араһында беренсе урынды алып тора ине. [illegible]

[illegible] урында ла юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Бойҙай сәселәсәк пар һәм туңға һөрөлгән ерҙәргә культивация үткәрергә кәрәк. Яҙ һөрөлгән май- [illegible]

1948—1949 йылдарҙа юғары урожай алғаны өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеү тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы колхозсылар, механизаторҙар араһында киң отклик тапты. [illegible]

В. Комаров,
БАССР Ауыл хужалығы министрының урынбаҫары.

МТС һәм совхоздарҙа коллектив договорҙар төҙөү башланды

4 майҙа машина-трактор станциялары, машина-трактор мастерскойҙарының һәм совхоздарҙың хужалыҡ һәм профсоюз ойошмалары 1948 йылға коллектив договорҙар төҙөү башланылар. [illegible] — 1326 коллектив договор төҙөйәсәк. [illegible]

[illegible] (ТАСС).

Ленин—Сталин комсомолының утыҙ йыллығы хөрмәтенә социалистик ярыш

Слеттан кайткас

«Ишимбайнефть» тресының монтаж-төҙөлөш конторалы комсомол ойошмаһы мине, слесарь, комсомолец Әсфәндияров менән икәүебеҙҙе йәш нефтселәрҙең республикан слетына вәкил итеп ебәргәйне. Слет беҙҙә ҙур тойғо ҡалдырҙы. Беҙ шунда уҡ цехтарҙағы мөмкинлектәрҙе киңерәк файҙаланыу юлдарын эҙләү, механик мастерскойҙы коллектив стахановсы эшкә күсереү бурысын ҡуйҙыҡ. Һәм слеттан ҡайтҡас та был турала контора директоры Мальцев, цех начальнигы Дизарев иптәштәр менән кәңәшләштек. Улар беҙҙең был фекерҙе хупланылар. Икенсе көндө үк эшселәр менән кәңәшмә уҙғарылды. Унда слеттың йомғағы тикшерелде, мөрәжәғәт өйрәнелде. Ошо кәңәшмәлә иптәш Әсфәндияров механик мастерскойҙы коллектив стахановсы эшкә күсереү мәсьәләһе тураһында һөйләне. Башлыса йәштәрҙән торған коллектив беҙҙең фекергә берҙәм ҡушылғанлығын белдерҙе. Эшселәр яңы йөкләмәләр алдылар һәм беренсе майға тиклем мастерскойҙы стахановсы итергә булдылар.

Башҡа предприятиеләрҙәге стахановсы участкаларҙың эш тәжрибәләренән сығып, беҙ ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә байтаҡ техник-ойоштороу сараларын тормошҡа ашырҙыҡ. Мөрәжәғәткә яуап итеп комсомолдың 30 йыллығын хеҙмәттә яңы еңеүҙәр менән ҡаршылау бурысы ҡуйылды һәм бөтә коллектив тә май алды стахановсы вахтаһына баҫты. Хәҙер нормаһын үтәмәүселәр юҡ. Эштең сифаты күтәрелде. Беренсе квартал планы 168 процентка үтәлде. Апрель айында хеҙмәт етештереүсәнлеге ныҡ үҫте. Комсомол комитете члены, социалистик ярыш инициаторы, слесарь Әсфәндияров март нормаһын 210 процентка үтәне, апрель айының ике декада нормаһын 250 процентка үтәне. Тимерсе Николайчук апрелдә ике ярымдан артығыраҡ һәм токарь Федотов бер ярым самаһы норма бирҙеләр. Комсомол группаһының етәксеһе иптәш Барсеньев үҙ нормаһын 132 процентка үтәне. Бындай яҡшы хеҙмәт өлгөләре күрһәтеүселәр аҙ түгел.

Механик мастерскойҙың өлгөһө башҡа цехтарға ла күсерелде. Бында комсомолецтар һәм йәштәр комсомолдың 30 йыллығына арналған ярыштың алдынғы сафында баралар, мөрәжәғәткә практик эш менән яуап бирәләр.

Николай Майоров,
Монтаж-төҙөлөш конторалының комсомол ойошмаһы секретаре.

Йәш нефтселәрҙең хеҙмәт подвигтәре

ОКТЯБРЬСК. Ҡаланың йәштәре араһында Башҡортостандың йәш нефтселәре слеты мөрәжәғәте киң рәүештә өйрәнелә. Ошо айҡанлы предприятиеләрҙә комсомолецтарҙең һәм йәш эшселәрҙең йыйылыштары уҙғарыла.

Ленин—Сталин комсомолының утыҙ йыллыҡ данлы юбилейен йыллыҡ производство йөкләмәләрен үтәү менән билдәләүгә саҡырған мөрәжәғәтте йәш нефтселәр ҙур дәрт менән ҡаршылайҙар, уға хеҙмәт подвигтәре менән яуап бирәләр.

Икенсе промыселдә комсомолец Манапов етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы хәҙер нефть сығарыуҙың көндәлек нормаһын 110—112 процентка үтәй. Бригада айлыҡ планын 20 апрелдә тамамлап, пландан тыш нефть сығарҙы.

Беренсе промыселдә мастер Казаченко участкаһы күбеһенсә йәш операторҙарҙан тора. Участка апрель айында эшен күренерлек рәүештә яҡшыртты, нефть сығарыу буйынса тәүлек заданиеларен арттырып үтәй. Был участка скважиналарҙы таҙа һәм тәртипле тотоуҙа алдынғы участкаларҙан иҫәпләнә.

Бораулау мастере иптәш Филипп Алексеевтең комсомолец-йәштәр бригадаһы айлыҡ проходка планын 20 көн эсендә тамамланы.

Беренсе комерле бораулау конторалы механик мастерскойының комсомолец, токарь Смирнов етәкселек иткән йәштәр сменаһы айлыҡ заданиеһен срогынан 8 көн алда үтәне. Смена йыллыҡ нормаһы беренсе октябргә башҡарып сығырға йөкләмә алды.

И. Болдогоев.

Байраҡлы бригада

Резина заводы комсомолецтаре һәм йәштәре комсомолдың 30 йыллығын достойн ҡаршылау өсөн арымай-талмай эшләйҙәр.

Улар производство пландарын үтәүҙә юғары хеҙмәт өлгөләре бирәләр. Комсомолка Засыпкина сәскес машиналары өсөн трубкалар әҙерләүҙә яңы рекорд бирҙе. Ул стахановсы вахтаға баҫып, сменала план буйынса билдәләнгән 300 урынына 716 трубка эшләне. Икенсе көндө комсомолкалар Семенова һәм Львова иптәштәр был рекордты ла уҙып киттеләр һәм бер сменала 764-әр трубка эшләп сығарҙылар.

Иптәш Егошина етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы көндәлек заданиеларҙе 150 процентка үтәй, бракһыҙ эшләй. Бригадаға ВЛКСМ-дың Молотов район комитете күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

А. Имангулов.

Агрегат заводының йәш стахановкалары.
Һүрәттә (һулдан уңға): 1. Регулировщица иптәш М. А. Бухтоярова — биш айлыҡ норманы 539 процентка үтәгән, 2. Комсомолка токарь иптәш З. Ф. Хаирова биш айлыҡ норманы 708 процентка үтәгән.
В. Жданов фотоһы.

Молотов районының эшсе йәштәре комсомолдың 30 йыллығына

Ағымдағы йылдың октябрь айында Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығы тула. Молотов районының эшсе йәштәре был данлы юбилейҙе үҙҙәренең йыллыҡ производство пландарын срогынан ике айға алда тамамлап ҡаршыларға һүҙ бирҙеләр.

Ярыштың тәүге йомғаҡтары комсомолецтарҙың һәм союздан тыш йәштәрҙең биргән үҙ вәғәҙәләрен тормошҡа ашырыуҙа фидакәр көрәшкәнлектәре тураһында һөйләйҙәр. Паровоздар ремонтлау заводындағы комсомолец-йәштәр бригадаһынан алдынғы урында барған иптәш Мартынов бригадаһы (арматур цехы) Беренсе Май хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып, апрель планын срогынан күп алда 187,2, Марданов етәкселегендәге йәш шлифовщиктар бригадаһы 185 процентка үтәнеләр. Айырым комсомолецтар, мәҫәлән, токарь Лукьянов, котельщик Чечуха, слесарь Васин иптәштәр тағы ла юғарыраҡ күрһәткестәр бирәләр. Улар үткән айҙың производство заданиеларен 275—326 процентка үтәгәйнеләр. Заводтың комсомолецтәре һәм союздан тыш йәштәре Беренсе Майҙы пландан тыш бер паровоз сығарыу менән билдәләнеләр.

Өфө паровоз депоһының, башлыса, йәштәрҙән торған ҡойоу цехы коллективе беренсе квартал планын 220 процентка үтәүҙе тәьмин итте. Бында йәш эшселәрҙән Козлова, Абрикосова, Соколов, Федоровтар көн дә икешәр норма биреп, коллективта өлгө булып торалар.

Райондың промышленность предприятиеләрендә меңдәрсә эшсе йәштәр, йөҙәрләгән комсомолец-йәштәр бригадалары иҫәпләнә. Был ҙур көс. Комсомол ойошмаларының бурыстары — алдынғыларҙың тәжрибәләрен башҡаларға достояние итеп әүерелдереүҙән, һәр бер бригаданың, сменаның һәм һәр бер комсомолецтең, союздан тыш йәш эшсенең үҙенә бирелгән производство планын һан һәм сифат яғынан үтәүсенә өлгәшеүҙән, комсомолдың данлы датаһын яңы еңеүҙәр менән ҡаршылауҙан тора.

Г. Әмиров.

Йыл ярымлыҡ норма үтәү өсөн

Начальнигы иптәш Кадзуев булған цехтың комсомолецтәре һәм йәштәре Ленин—Сталин комсомолының 30 йыллығын достойн ҡаршылау өсөн агрегат заводы йәштәре араһында социалистик ярышты ойоштороп ебәреүҙә инициатор булдылар һәм улар юбилей көнөнә йыл ярымлыҡ норма үтәүгә йөкләмә алдылар.

Йөкләмәләрҙе үтәү буйынса яҡшы эш күрһәткестәре бар инде. Комсомолецтәр револьверщик Расказов, арматурщица Дубравина, токарь З. Хәирова иптәштәр һәр сменала ике ярым норма бирәләр. Завод дирекцияһы уларҙы бер айлыҡ хеҙмәт хаҡы күләмендә аҡса менән бүләкләне.

Ярышта хеҙмәттең яҡшы өлгөләрен күрһәтеүселәр күп. Комсомолецтәр токарь Насиров, прессовщица Максимова иптәштәрҙең эш көндәре һәр сменала ике һәм унан да артығыраҡ норма биреү менән тамамлана.

Колхоздың алдынғылары

Һаҡмар йылғаһының дуғаланып киткән урынында Ярат ауылы ята. Был ауылда Карл Маркс исемендәге колхоз. Ул Баймаҡ районының алдынғы ауыл хужалығы артеле. Был артелдең урожай мастерҙәренән быйыл иптәш Ғиниәт Насировҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, 4 кеше Ленин ордендәре, 8 кеше Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре, 5 кеше «Хеҙмәт батырлығы өсөн» медалдәре һәм 8 кеше «Хеҙмәт отличиеһе өсөн» медалдәре менән наградланды. Наградлылар ауылы ул — Ярат ауылы.

Иркен урамлы ауыл, йыйнаҡ һәм баҡсалы өйҙәр. Ә өйҙәр артында келәттәр, һарайҙар һәм фермалар. Урамдың бер яҡ осонда маҡтаулы звеновод Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғиниәт Насировтың өйө, ә икенсе яҡ осонда — алдынғы колхозсы Ленин орденле Фәтхислам Үзәнбаевтыҡы.

— Был өйгә, — ти иптәш Үзәнбаев, — былтыр ғына индем. Мин тәүҙә өй һалырға, ә унан һуң колхозда тырышып эшләргә уйланым. Быны ҡатынға ла әйттем, — ике теләгем бар, — тинем. Ә ул, колхоздың стахановсыһы, икенсе төрлө кәңәш бирҙе: «Тәүҙә, — ти ул әйтә, — колхозда яҡшы эшлә, шунан—өй ҙа һалынып». Дөрөҫ әйткән икән минең Шәмсенисам. Уның кәңәшен тоттом — звенола ең һыҙғанып эшләнем һәм колхоз өй ҙә һалып бирҙе. Бына, шул өй был.

Өй ҙур һәм йыйнаҡ. Уның эске күренеше лә культуралы: түрендә балаҫлы урындағы ла, скатертле өҫтәле лә бар. Ә усағында ҡаҙан да, плита ла урынлаштырылған.

— Бына беҙҙең китаптарыбыҙ, — ти ул, өҫтәлдәге Ленин томдарын күрһәтеп. — Уҡыйым.

Иптәш Үзәнбаев — йәш коммунист, уҡыуҙа ла, производствола ла актив колхозсы. Звенола ул иң ауыр эштәрҙе башҡара. Яҙғы осорҙа ул — һабансы, комбайнда — штурвалсы, ә молотилкала — барабансы. Һәм бөтә эштә лә норманы арттырып үтәй. Мәскәү, Калинин, Волхов, Ленинград, Псков ҡалалары юлдарында һуғыштарҙа ҡатнашҡан һәм 4 тапҡыр яраланған сержант Үзәнбаев тыныс хеҙмәт фронтында ла. һуғышсан һәләтлек менән эшләй. Үҙған йыл ул 550 хеҙмәт көнө эшләне. Был алдынғы, тырыш колхозсыны быйыл артель правлениеһе йылҡы фермаһының мөдире итеп ҡуйҙы. Бында ла уның эше өлгөлә. Ул быйыл 260 баш йылҡыны тейәл һәм тулы ҡорлоҡта ҡышлатты. Ә 74 баш эш атының көрлөгө тағы ла яҡшыраҡ.

— 40 баш бейәнән 40 ҡолон алам быйыл,—ти ул.

Әйткән һүҙ — атҡан уҡ. Ярат ауылы кешеләре әйткән һүҙҙәрендә ныҡ торалар улар. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын өйрәнгәс, былтыр звенолар юғары урожай үҫтерергә һүҙ биргәйнеләр. Вәғәҙә үтәлде, мул урожай яулап алынды.

Беренсе звено 11 гектар арыштың һәр гектарынан 30,7-шәр, 16 гектар арыштың һәр гектарынан 24,1-әр центнер, 22 гектар бойҙайҙың һәм 28 гектар һолоноң һәр гектарынан 12-шәр центнер урожай алды. Звеноның стахановсылары Мәүлем Мәтәфуров, Фәтхулла Утарбаев, Нурия Исчурина иптәштәр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре менән, Мөхәмәт Ҡарамурзин, Бәҙерниса Ғәделшина, Роза Рысбаева һәм Фатима Аҙаматова иптәштәр медалдәр менән наградландылар. Ә звеновод иптәш Насиров иң юғары исем алды.

Ә икенсе звено 9 гектар арыштың һәр гектарында 30,1-әр центнер, 16 гектар арыштың һәр гектарында 20,4-әр центнер, 20 гектар бойҙайҙың һәр гектарында 11-әр центнер урожай үҫтерҙе. Звеновод Нурия Үзәнбаева һәм звено стахановсыһы Ғүмәр Исчурин иптәштәр Ленин ордендәре менән, Сәғәт Мырҙабулатов, Әптелхай Әхмәтов, Нәбиулла Мусин иптәштәр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре менән һәм Хәтимә Вәлиева, Мәликә Әхмәтова, Маһикамал Юлдашбаева, Һөйөндөк Юлдашбаев, Хәбибъямал Хушкилдина иптәштәр медалдар менән наградландылар.

Колхозда наградланыусылар улар ғына түгел... Дөйөм артель эшендәге хеҙмәттәре өсөн Ғатаулла Ғәделшин, Ғибәҙәт Баймөхәмәтов, Мәликә Йыһаншина һәм Мәдинә Ғүмәрова иптәштәр медалдәр менән, бригадир Мөхәмәтхәбиб Әхмәтов һәм председатель Ибраһим Уйылданов иптәштәр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре алдылар.

Наградланыусылар араһында С. Мырҙабулатовҡа 65, ә Р. Рысбаеваға 14 йәш. Юлдашбаевтар менән Исчуриндәр семьяһында наградланыусылар икешәр кеше. Колхозсыларҙың күкрәктәрендә хәҙер бер «Ураҡ һәм сүкеш» алтын йондоҙо, 13 орден, 68 медаль ялтырай. Ә колхозда 61 хужалыҡ һәм 65 хеҙмәткә яраҡлы кеше.

Хеҙмәткә яраҡһыҙ һаналған колхозсылар ҙа эшләмәй ята алмайҙар бында. Сталинградтан алып Берлинға тиклем юлды үткән танкист гвардия өлкән сержанты Ғәли Дәүләтбирҙин ана шуларҙың береһе. Ул дүрт тапҡыр яраланған һәм иң һуңында фронттан ҡулһыҙ ҡайтҡан. Ләкин ул ҡулһыҙ килеш тә оҫта хеҙмәт итә ала.

— Беҙҙең халҡта, — ти иптәш Дәүләтбирҙин, — ҡулдан килгәндә эшләү тигән һүҙ бар. Ә мин ҡулдан килмәгәнде лә эшләйем. — Иң алыҫ Ярҡын, Ҡояшле һәм Аҡташ участкаларында баҫыу стандарын Ярат ауылы менән тоташтырыусы связной ул.

Ә Ғатаулла Ғәделшин? Ул ҙа инвалид. Уның ҡулынан таяҡ төшмәй, ә күберәк ваҡытта ҡултыҡ таяғы йөрөтә. Шулай ҙа колхозда уның аяҡ баҫмаған эш участкаһы юҡ. Ул бөтә ергә етешә. Үҙе етешмәгән урындарға уның ойоштороу көсө — коммунистар етешәләр. Ул колхоз партия ойошмаһының секретаре.

— Ойошмабыҙ ҙур түгел, 9 ғына коммунист беҙҙә, — ти иптәш Ғәделшин. — Беҙҙең коммунистар бөтә эштә лә алдынғылар һәм ойоштороусылар.

Колхоз комсомол ойошмаһы ла көслө.

— Быйыл, — ти уның секретаре Ҡыҙыл Йондоҙ орденле хәрби инвалид Сафа Утарбаев, — комсомолецтәр һаны тағы ла артасаҡ.

Дәртле һәм көслө был колхоздың кешеләре.

Һаҡмар буйына тағы ла яҙ килде. Карл Маркс исемендәге артелдең орденле һәм медалле колхозсылары быйыл да юғары урожай үҫтереү өсөн баҫыуҙарға сыҡтылар.

— Уңышлы эш һеҙгә, иптәштәр!

Фәйзи Бикбов.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Чан Кай-Ши яңы кабинет төҙеүҙе Хо Ин-Цинға тапшырҙы

ШАНХАЙ, 5 май. (ТАСС). «Синьвэньбао» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, кисә башҡарма Юандең ултырышында кабинеттең тулы составта отставкаға китеүе тураһында ҡарар ҡабул ителгән.

ШАНХАЙ, 5 май. (ТАСС). «Дагунбао» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Чан Кай-Ши яңы кабинет төҙеүҙе Хо Ин-Цингә тапшырған.

Берлиндә фашистик провокация

БЕРЛИН, 5 май. (ТАСС). Берлиндә сыға торған «Трибюне» газетаһы былай тип яҙа: элек йәшерен тороусы фашистик элементтарҙың демократик фекерҙәге немецтәрҙе ҡурҡытырға тырышып, асыҡтан-асыҡ хәрәкәт итә башлауҙары һәм провокацион һәм террористик актылар яһауҙары тураһында һәр көн һайын хәбәрҙәр килеп тора. Ошондай ваҡиғаларҙы Берлиндең Америка секторында ла күҙәтергә мөмкин.

«1 майҙа, — тип хәбәр итә газета, — Макситрвес (Шенеберг районы) урамындағы 7-се номерлы йорт алдында фашистар төркөмө «Беҙ — милли социалистар» тип ҡысҡырып, тәҙрәһендә ҡыҙыл флаг элеп торған квартираға таш ырғыттылар. Был йорт алдынан үтеп барыусы Америка оккупацион власттарының сотруднигы был төркөмгә ҡушылды һәм квартираға барып инде. Флагты алды һәм балкондан урамға ырғытты, унда был флаг фашистар тарафынан ыртҡылап ташланды».

«Әлегәсә,—тип яҙа газета һәҙәмтәләү һүҙендә, — полиция ошо ваҡиға тураһында никһы белгән лә, был эште тикшереү өсөн бер нимә ҙә сара күрмәне әле».

Лейборист Макартур компартияға инде

ЛОНДОН, 5 май. (ТАСС). «Дейли Уоркер» газетаһы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, 1945 йылдағы дөйөм һайлауҙарҙа Ренфруҙан лейбористик кандидат Макартур, лейбористар партияһы сафынан сығып, коммунистар партияһы сафына кигән.

Бельгия хөкүмәтенең отставкаға сығыуы

БРЮССЕЛЬ, 5 май. (ТАСС). Айырым кешеләр (сиркәү) ҡарамағындағы мәктәптәргә 1948 йылға субсидиялар биреү тураһындағы мәсьәлә буйынса парламентта алып барылған фекер алышыуҙарҙан һуң, Спаак хөкүмәте отставкаға сығыуы тураһында белдерҙе. Уны күпселек яҡламаны. Принц-регент отставканы ҡабул итте.

Көнбайыш Германияла аслыҡ һәм забастовкалар

БЕРЛИН, 5 май. (ТАСС). Аслыҡ һәм бөлгөнлөк Көнбайыш Германия эшселәрен яңынан массовый забастовкалар башларға мәжбүр итте. АДН агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 3 майҙа, Ганноверҙа 30 мең эшсе-металлист баш күтәргән.

Шулай уҡ Аугсбургтан да (Америка зонаһы) забастовкалар тураһында хәбәрҙәр килә. «Континенталь» заводының 8 мең эшсеһе забастовка иғлан итергә әҙерләнә.

Ганноверҙа металлистар профсоюзы председателе, тәьминәт министерствоһы менән булған һөйләшеүҙәрҙә ҡатнашлыҡ иткән Данненберг ҡалала аҙыҡ-түлек мәсьәләһенең бик ауыр хәлдә булыуы тураһында хәбәр итте. «Бындай шарттарҙа, — тине ул, — эшселәрҙән уларҙың үҙ предприятиеләренә кире ҡайтып эшкә тотоноуҙарын талап итергә мөмкин түгел».

Көнбайыш Германияның башҡа ҡалаларында аҙыҡ-түлек мәсьәләһе яҡшы түгел. Мәҫәлән, АДН агентствоһының хәбәрсеһе Мюнхендән, 4 майҙа халыҡҡа ит биреүҙең туҡтатылыуы тураһында белдергән. Бер үк ваҡытта, ике зона органдарының туҡланыу продукттарына хаҡтарҙы күтәрергә ҡарар итеүҙәре тураһында билдәле булды.

АДН агентствоһы Нюрнбергтән, Америка зонаһының күп кенә райондары үҙҙәрен икмәк менән тәьмин итә алмаһылар, сөнки печкарҙар айына, гәҙәттәгесә, 20.000 тонна он алыу урынына бары тик 3.500 тонна ғына он алалар, тип хәбәр итә. Төньяҡ Рейн-Вестфалия еренең тәьминәт министры Эрих Любке, яҡын киләсәк ваҡытта икмәк менән тәьмин итеү тағы насарлана төшәсәк, тип белдерҙе. Сепаратный аҡса реформаһы тормошҡа ашырылһа, тине ул, аҙыҡ-түлек продукттары хаҡы 100 процентҡа артасаҡ.

ЛОНДОН, 5 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Ганноверҙан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Түбән Саксонияла (Англия зонаһы) аҙыҡ-түлек нормаларының түбән булыуына ҡаршы протест забастовкалары йылдам рәүештә үҫә бара. Тотош алғанда Түбән Саксонияла хәҙер 50 мең кеше баш күтәрә.

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 5 май. (ТАСС). Азат Грецияның радио станцияһы 10 апрелдән башлап 30 апрелгә тиклем Эгей Македонияһында демократик армияның операциялары тураһында хәбәр тапшырҙы.

Алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Көнбайыш Македонияла демократик армия частәре артиллерия уты менән Нестори ҡалаһындағы хәрби объекттарға атҡандар һәм Касте-Нестори ҡалаһына ингәндәр. Демократик армия частәре шулай уҡ Андрия ауылы янындағы хәрби лагерҙарға һөжүм иткәндәр һәм Эдеса өлкәһендә Кардия Сараکини секторында король армияһы частәренең позицияларына атаҡа яһағандар. 11 сәғәт дауам иткән һуғыштан һуң дошман, артиллерия һәм авиация ярҙам итеүенә ҡарамаҫтан, сигенергә мәжбүр булған.

Демократик армия Каламбак секторында Пефку ауылын алған һәм дошмандың Васили бейеклеген алырға булған бөтә маташыуҙарын кире ҡаҡҡан.

Демократик армияның Серры штабына буйһонған частәре был ҡала янындағы ныҡытылған Ахладохори ауылын атакаға тотҡандар һәм дошмандың йәнле көсөнә байтаҡ юғалтыуҙар яһағандар. Бик күп трофейҙар алынған.

Рено заводтары эшселәре алдында Мартиҙең сығышы

ПАРИЖ, 5 май. (ТАСС). 4 майҙа Булонь-Бийанкурҙа (Париж биштәһе) Рено заводтары эшселәре алдында сығыш яһап, Франция коммунистар партияһы секретаре Андре Марти, Рено заводтары эшселәренең боевой рухы уларға байтаҡ уңыштарға өлгәшергә мөмкинлек бирҙе, тип айырыуса билдәләне. «Кисектергеһеҙ талаптар өсөн көрәш, ти Марти, эшселәрҙә предпринимателдәрҙе сигенергә мәжбүр итеү мөмкинлегенә ышаныс тыуҙыра».

Марти, Рено заводтарының ҡайһы бер изделиеләренә булған хаҡтар һуғышҡа тиклемге хаҡтарға ҡарағанда 12,5 тапҡырға артты, ә эшселәрҙең хеҙмәт хаҡы бары тик 5,5 тапҡырға ғына артты, тип билдәләне. Коммунистар, тинә Марти, йәштәрҙең хеҙмәт хаҡының өлкән кешеләрҙең хеҙмәт хаҡына ҡарағанда 20 процентҡа артығыраҡ кәметелеүенә айырыуса иғтибар бирергә тейештәр. «Бер төрлө хеҙмәт өсөн — бер төрлө хеҙмәт хаҡы, беҙ быны һәр ваҡыт талап иттек һәм талап итеүебеҙҙе дауам итәрәбеҙ».

Рено заводтары эшселәренең һөжүмы, тип дауам итте Марти, хөкүмәтте алыштырыу тураһындағы мәсьәлә менән бәйләнгән. Францияны колонияға төшөрөүсе договорҙарҙы һәм килешеүҙәрҙе ғәмәлдән сығарыуҙы күҙҙә тотоусы беҙҙең милли азатлыҡ программабыҙҙы тормошҡа ашырырға кәрәк. Көнсығыш Европа илдәре менән сауҙа итергә теләмәйенсә, хөкүмәт беҙҙең промышленносебеҙҙе быуа. «Франция тауарҙарын һатыу өсөн берҙән-бер ҙур һәм ышанысла баҙарҙар булған Үҙәк һәм Көнсығыш Европа илдәре менән нормаль сауҙа мөнәсәбәттәрен аяҡҡа баҫтырырға кәрәк».

Сенатор Тэйлорға суд

НЬЮ-ЙОРК, 5 май. (ТАСС). Матбуғаттың Бирмингамдан (Алабам штаты) хәбәр итеүенә ҡарағанда, полиция судьяһы Холл өсөнсө партиянан вице-президент посына кандидат сенатор Тэйлорҙы (демократ, Айдахо штатынан) «тәртип боҙоуҙа ғәйепләп» тип ҡулға алған. Ул 1 майҙа «Көньяҡ штаттарҙағы негр йәштәре конгресе» съезына негрҙар өсөн билдәләнгән ишектән ингән. Судья Тэйлорға 50 доллар күләмендә штраф һалды һәм уны 6 ай буйынса төрмәлә ябып тоторға хөкөм сығарҙы, ә хөкөм ҡарарын еренә еткереү кисектерелеп торолдо.

Ассошийэйтед пресс агентствоһы хәбәрҙәренсә, Тэйлорҙы яҡлаусы кешеләр, шул иҫәптән бер негр осо ҡалһа, негрҙар аҡ тәнлеләрҙән айырып ултыртылыуға ҡаршы апелляция бирәсәктәр. [illegible] аҡ тәнлеләрҙән [illegible] һәм һуҙҙан негрҙарҙы айырыуға ҡаршы булғанлыҡтары өсөн ҡулға алыныуҙары тураһында [illegible] белдерҙеләр.

Шул уҡ агентствоның хәбәренсә, сенатор Тэйлорҙың ҡулға алыныуы тураһында һөйләп, өсөнсө партиянан президент посына кандидат Уоллес пресс-конференцияла, әгәр ул Көньяҡ штаттарға килә ҡалһа, негрҙар аҡ тәнлеләрҙән айырылған ниндәй ҙә булһа митингыла ла сығыш яһамаясаҡ тураһында белдерҙе, тип хәбәр итә.

Греция демократтарын үлтереү

БЕЛГРАД, 6 май. (ТАСС). Азат Греция радиостанцияһы кисә Афиныла, Салоникиҙа һәм башҡа ҡалаларҙа, 3 майҙа, монархистикфашистик власттарҙың Греция патриоттарын атып үлтереүҙәре тураһында хәбәр итте. 10 көндә тағы ла 830 кеше үлтерелергә тейеш.

Радиостанцияның тапшырыуында шуның ары, 1947 йылдың июленлә, демократик армияға ҡаршы яҙы һөжүм уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң, Афиныың хакимлек итеүсе клиҡаһы азатлыҡ хәрәкәтенең төрлө 17 көрәшсеһен үлтерҙе. 1947 йылдың июленән алып 1948 йылдың 3 майына тиклем, шулай итеп, 400-ҙән артыҡ кеше атып үлтерелде. 5 майҙа тағы ла Эластин (Греция Гитлер оккупацияһы ваҡытында партизандар отрядтәре) 154 члене үлтерелде. Улар фашизмға ҡаршы көрәш алып барғандары өсөн үлем язаһына хөкөм ителделәр.

Цивилизациялы бөтә кешелек донъяһы алдында, — тип әйтелә радиостанцияның тапшырыуында, — беҙ оккупанттарға ҡаршы геройҙарса көрәшеүсе ғәйепһеҙ кешеләргә ҡарата ошондай ҡот осҡос енәйәткә ҡаршы протест белдерәбеҙ.



Өфө. Ағиҙел йылғаһында яҙғы ташкын ваҡытынан бер күренеш. Н. Архипов фото-этюде.

Намыҫлы хеҙмәт

Яуымбаев Гәни инде 18 йыл колхозды тәбүнсе булып эшләй. Йылҡысылыҡта уның тәжрибәһе ҙур. Уҙ эшен һөйөп башҡарыусы арҡаһында ул тик һуңғы ос йыл эсендә генә колхозға 142 баш ат үҫтереп бирҙе. 1945 йылда 40 бейәнән 40 колон, 1946 йылда 56 бейәнән 56 колон, 1947 йылда 46 бейәнән 46 колон алды.

Быйыл иптәш Яуымбаев етәкселек иткән көтөүҙә 160 баш ат, шулар эсендә 60 бейә бар. Бейәләрҙең бөтәһе лә быуаҙ.

Иптәш Яуымбаев был уңыштарға нисек ирешә һуң?

Уның планы бар. Планда көтөүгә аттарҙы йыл буйына тәрбиәләү мәсьәләләре ҡаралған. Аттар көтөүлеге 4 участкаға бүленгән. Был участкалар нәүбәтләп файҙаланыла. Тиҙ-тиҙ йыйылған аттар урын бар. Һауа торошо насар булғанда, бигерәк тә ҡышҡы буранлы көндәрҙә аттар шул ышыҡта һаҡланалар.

Яҙ һәм көҙ көндәрендә була торған боҙлауыҡтар көтөүгә зыянлы өсөн бик ҡурҡынлыҡ. Быйыл ҡалдарҙа ла иптәш Яуымбаев аттарҙы ышыҡ урынға тота. Ҡышҡы осорҙа атҡа ашатыу, һуғарыу эштәре ойошторола. Ат эшләгән аттарҙы тергеҙеү эштәре ҡуйыла. [illegible]

Бейәләргә тороҡтору, буй алыусы сараларына иғтибар итеү, [illegible] ҡулай ваҡыттарҙа ла иҫәпкә алынып барыла. Шуның һөҙөмтәһендә бер бейә лә ҡыҫыр ҡалдырылмай.

Была ошондай хостарҙан күреп арҡаһында иптәш Яуымбаев был йылда бөтә бейәләрҙән колон алыу үҫтерә, ул был йыл да 60 бейәнән 60 колон алырға һүҙ бирҙе.

И. Каримов.

Әбйәлил районы, Буденный исемендәге колхоз.

Кошсолок промышленносе өсөн кадрҙар

«Главптицепромдың» Башҡортостан тресы үҙенең системаһы өсөн квалификациялы кадрҙар етештереү буйынса ағымдағы йылда күп кенә практик саралар үткәреүҙе планлаштырҙы. Пенза өлкәһендә кошсолоҡ-йомортҡасылыҡ промышленносе ФЗУ мәктәбендә йыллыҡ курста 10 кеше уҡый. Улар мәктәпте тамамлап ҡайтҡас та Баштптицепром тресы предприятиеләрендә мастер итеп эшләйәсәктәр.

Хәҙерге ваҡытта трест «Главптицепромдың» Россошанский техникумына башҡорт һәм татарҙарҙан уҡыусылар әҙерләүҙе тәьмин итә. Улар техниктар һәм технологтар булып сығасаҡтар.

А. Кучуков.

Донъя шахмат чемпионаты

Шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн матч-турнирҙың 21-се туры 6 майҙа уйналды. Смыслов менән Решевский һәм Эйве менән Керес осрашты. Был турҙы ярыштың биш енсе һәм һуңғы туры, тип һанаусыларҙың ҙур ярашлы ла бирәр партия уйнарға тейештәр.

Был турҙа Смысловтың Решевский менән осрашыуы ҙур спортив ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Улар хәҙерге 2—3 урындарҙы икеһе бүлешәләр. Шулай итеп, уларҙың осрашыуы турнирҙа икенсе урын өсөн көрәштә әһәмиәтле урын алып торҙо. Партия кисектерелде. Бөтә кешеләр ҙә бер ҡараштан тупланғандар, шуға күрә партияны ошондай бер көрәштә Смысловҡа яҡшы мөмкинлектәр бар. Керес—Эйве партияһында Эйве маттан ҡотолорлоҡ хәлдә булғанлыҡтан, бирелде.

21-се турҙан һуң ҡатнашыусыларҙың хәле түбәндәгесә: Ботвинниктең мөмкин булған ун алтынан — 12 очкоһы, Смысловтың — 8, Решевскийҙың ун алтынан — 8 (бер кисектерелгән партиялары менән), Керестең ун етенән — 8,5 һәм Эйвенең ун етенән—3,5 очкоһы бар.

Халыҡ-ара шахмат матч-турниренә сит ил ҡунаҡтарының килеүе

Шахмат буйынса бөтә донъя беренселегенә Мәскәүҙә бара торған матч-турнир сит илдәрҙә ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Турнирҙең һөҙөмтәләү өләшенә төрлө илдәрҙән ҡунаҡтар килә башланы.

Чехияның атаҡлы мастере Карел Опоченский әфәнде һәм Югославияның физик культура һәм спорт эштәре буйынса Комитетенең шахмат секцияһы председателе Милютин Райкович әфәнде 6 майҙа Мәскәүгә килделәр.

Шулай уҡ шахматтар буйынса Болгария чемпионы Юрий Тошев әфәнде һәм Польшаның шахмат федерацияһы президенте Станислав Войнарович әфәнде Мәскәүгә килделәр.

СССР Министрҙәр Советы ҡарамағындағы физик культура һәм спорт эштәре буйынса Комитетының саҡырыуы буйынса Голландиялы Халыҡ-ара Шахмат Федерацияһы Президенте (ФИДЭ) доктор Александр Рюб 6 майҙа Мәскәүгә килде. (ТАСС).

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Экзамендәр алдынан

Уҡыусыларға һәм ата-әсәләргә бер нисә кәңәш

Уҡыу йылын тамамлауҙа хәл иткес осор—дүртенсе сирек башланды. Экзамендәргә һәм һынауҙарға һанаулы көндәр генә ҡалды. Был осорҙо уҡыусылар ни тиклем яҡшы файҙаланһалар, шул тиклем улар үҙҙәрен экзамендәрҙә һәм һынауҙарҙа тыныс һәм ышаныслы тойорҙар, экзамендәрҙе уңышлы үткәрерҙәр һәм йәй көнөндә яҡшы ял итергә мөмкинлектәр алырҙар.

Был аҙ ғына ваҡытты нисек файҙаланырға һуң?

Бөтәһенән алда уҡыу йылы буйына уҙған материалды бик ентекләп ҡабатларға, электән насарыраҡ үҙләштерелгән бүлектәргә айырыуса иғтибар бирергә кәрәк.

Ҡабатлау материалды тулыһынса аңлауға, үҙләштереүгә, дөрөҫ һөйләп бирә белеү һөҙөмтәһенә килтерергә тейеш. Был ваҡыт айырым бүлектәрҙең үҙ-ара бәйләнештәрен аңлай белеү бик әһәмиәтле булып тора.

Мәҫәлән, бишенсе класта уҡыусы арифметика буйынса теге йәки был миҫалды һөйләү һәм күрһәтеү менән генә сикләнмәйенсә, уның ни өсөн шулай булырға тейеш икәнлеген дә аңлата белергә тейеш.

Бындай һөҙөмтәгә башта бөтә курс материалын системалы рәүештә, ә унан һуң темаларға бүлгеләп ҡабатлағанда ғына ирешергә мөмкин. Ләкин күп уҡыусылар был тәртипте боҙалар: бөтә курс материалын ҡабатлауҙан баш тартып, тик билеттәр буйынса ғына экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнәләр. Был бик ҙур хата: материалды билет буйынса ғына ҡабатлау темаларҙы бер береһенән айыра, өҙгөләй, системаны боҙа һәм фән буйынса тулы белем ҡалдырмай. Бындай белем формаль була, тиҙ онотола, сөнки ул фекерләүгә нигеҙләнмәй, тик айырым моменттәрҙе иҫтә генә ҡалдыра. Бөтә курс материалын ҡабатлап бөткәс кенә, экзамендәр һәм һынауҙар алдынан билеттәргә күсергә кәрәк.

Бөйөк рус педагогы К. Д. Ушинский ҡабатлауҙы активҡа һәм пассивҡа айыра. Пассив ҡабатлау ваҡытында уҡыусы башта бөтә материалды китаптан уҡый йәки кеше уҡығанын тыңлай, ә унан һуң ғына һөйләп ҡарай. Актив ҡабатлау һөйләүҙән башлана: уҡыусы үткән материалды китапҡа ҡарамайынса иҫенә төшөрөргә һәм уны һөйләп бирергә тырыша. Һөйләгәндән һуң материал китаптан уҡыла һәм һөйләгәндә төшөп ҡалғандары тулыландырыла.

Пассив ҡабатлауға ҡарағанда, актив ҡабатлау күберәк һөҙөмтә бирә, сөнки был ваҡыт уҡыусының хәтере байый һәм үҙ алдына эшләй белеү сифаты үҫә, иғтибары туплана, ваҡытҡа экономия яһала. Бер битте ун тапҡыр уҡып сығырға мөмкин, ләкин иғтибарһыҙ уҡыһаң һәм уҡыған материалыңды һөйләп ҡарамаһаң, унан бер нәмә лә аңламаҫһың, уҡығаның да иҫтә ҡалмаҫ. Уҡығанды үҙ-үҙеңә йәки иптәштәреңә һөйләп сығыу мотлаҡ кәрәк нәмә. Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнгәндә уҡыусыларға ҡабатлауҙың ошо актив формаһын файҙаланыуҙы тәҡдим итәбеҙ.

Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерлек ваҡытында уҡыусы төрлө ауырлыҡтарға осрарға мөмкин, бында уҡытыусыларҙың ҙур ярҙамы талап ителә. Уҡыусылар материалды ҡабатлағанда аңлашылмаған мәсьәләләр буйынса уҡытыусыға мөрәжәғәт итергә тейештәр. Һәр бер мәктәптә консультациялар ойошторолһон һәм уларҙа балаларға тулы ярҙам күрһәтелһен.

Бик күп балалар ике-өс кеше йыйналып бергәләп ҡабатларға яраталар. Былай группалап ҡабатлау һәр бер уҡыусының материалды үҙ алдына уҡып үҙләштергәндән һуң бик файҙалы була. Бергәләп ҡабатлағанда улар һөйләйҙәр, бер-береһенең белемен тулыландыралар, хаталарын төҙәтәләр.

Экзамендәргә әҙерләнеү уңайы менән дүртенсе сиректә экзамендәр инструкцияһында күрһәтелгәндәрҙән бер нисә яҙма эш үтәргә кәрәк. Тикшереү һәм рецензия яһатыу өсөн уҡыусы был яҙма эштәрҙе уҡытыусыға тапшырырға тейеш.

Экзамендәргә әҙерләнеү осоронда көндөң һәр сәғәтен һәм минутын дөрөҫ файҙаланыу, ялды дөрөҫ ойоштороу бик әһәмиәтле булып тора. Физик хеҙмәтте лә ташларға ярамай. Физик хеҙмәт—башты ял иттереү өсөн файҙалы һәм кәрәкле средстволарҙың береһе. Спорттың ял итеүҙең гүзәл бер формаһы икәнен шулай уҡ иҫтә тоторға кәрәк.

Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнгәндә, ҡайһы бер балалар кеүек, төндәр буйына уҡып ултырырға ярамай. Был ваҡытта нормаль йоҡлау (тәүлеккә 7—8 һәм 8—9 сәғәт) материалды яҡшы үҙләштереү һәм эш һәләтлеген күтәреү өсөн төп средство булып тора. Шуға күрә уҡыусы баланың экзамендәргә әҙерлек осоронда нормаль йоҡлауы шарт. Ата-әсәләр балаларға төндәр буйына ултырырға ирк бирмаҫҡа тейештәр.

Уҡыу йылының был бик яуаплы осоронда ата-әсәләр мәктәп менән бәйләнештәрен көсәйтергә, балаларға бик ҙур иғтибар бирергә, уларға төрлө булышлыҡ күрһәтергә тейештәр.

Балаларҙы уҡытыу һәм тәрбиәләү беҙҙә государство әһәмиәтенлеге эш булып тора. Тыуған илебеҙҙең киләсәге был бурысты уңышлы үтәүгә тығыҙ бәйләнгән. Уҡыуҙың бөтә һөҙөмтәләре өсөн мәктәп балалары һәм ата-әсәләр Тыуған илебеҙ алдында тулы яуаплылыҡ һиҙергә тейештәр. Үҙебеҙҙең патриотик бурысыбыҙҙы үтәйек, уҡыу йылын уңышлы тамамлайыҡ!

П. Глухов,
Педагогик фәндәр кандидаты.

Транспорт артеле — «Объединениегә» Өфө ҡалаһы пристандарында һәм тимер юл станцияһында эшләү өсөн грузчиктар, ремонт-төҙөү эштәре буйынса балта оҫталары, мейес сығарыусылар, ҡалайсылар кәрәк.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Зенцов урамы, 45-се номерлы йорт.

БӨГӨН КИНОЛАРҘА

«Октябрҙә» — «ГАВРОШ», «ВАРЯГ КРЕЙСЕРЕ» һәм «ӨСӨНСӨ УДАР».

«Салауатта» — «КОМСОМОЛЬСК».

Матросов исемендәге кинола — «ГВАРДИЯ РЯДОВОЙЫ АЛЕКСАНДР МАТРОСОВ».

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 001730. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө кала Советы органы.

28-сы йыл сыға
1948 йыл
№ 92
9
май
йәкшәмбе
хаҡы 20 тин

Бөгөн совет халҡы һәм уның Ҡоралл ы Көстәре фашистик Германияны Еңеү көнөн байрам итәләр.

Йәшәһен героик совет халҡы, еңеүсе халк!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы, юлбашсыбыҙ һәм полководецебеҙ Советтар Союзы Генералиссимусы бөйөк Сталин!

ССР Союзы Ҡоралл ы Көстәре Министре ПРИКАЗЫ

9 май 1948 йыл — № 22 — Мәскәү калаһы

Иптәштәр, һалдаттар һәм матростар, сержанттар һәм старшиналар! Иптәштәр, офицерҙәр, генералдар һәм адмиралдар!

Бөгөн совет халҡы һәм уның Ҡоралл ы Көстәре фашистик Германияны бөйөк Еңеү көнөнөң өс йыллығын билдәләйҙәр.

Беҙҙең юлбашсыбыҙ бөйөк Сталин етәкселегендә совет халҡы һәм уның Ҡоралл ы Көстәренең был тарихи еңеүе совет государствоһының ҡеүәтен, Советтар Союзы халыҡтарының берҙәмлеген һәм уның үҙ социалистик Тыуған иленә, Совет Хөкүмәтенә һәм беҙҙең данлы Ленин — Сталин партияһына бирелгәнлеген күрһәтте.

Фашистик Германияны еңеүҙең өс йыллығы менән һеҙҙе ҡотлайым һәм тәбрик итәм.

Германияны Еңеү байрамын билдәләп, ПРИКАЗ БИРӘМ:

Бөгөн, 9 майҙа, беҙҙең Тыуған илебеҙҙең башҡалаһы — Мәскәүҙә, союзный республикаларҙың башҡалаларында, шулай уҡ Калининградта, Львовта, һәм герой ҡалаларҙа: Ленинградта, Сталинградта, Севастополдә һәм Одессала — утыҙ артиллерия залпы менән салют бирергә.

Йәшәһен ҡеүәтле совет халҡы һәм уның батыр Ҡоралл ы Көстәре!

Йәшәһен Бөтә Союз Коммунистар большевиктар партияһы — беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе рухландырыусы һәм ойоштороусы!

Йәшәһен беҙҙең бөйөк юлбашсыбыҙ һәм полководецебеҙ иптәш Сталин!

Беҙҙең Тыуған илебеҙҙең азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн көрәштәрҙә һәләк булыусы геройҙарға мәңгелек дан!

ССР Союзы Ҡоралл ы Көстәре Министре
Советтар Союзы Маршалы
Н. БУЛГАНИН.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫ ГЕНЕРАЛИССИМУСЫ ИОСИФ ВИССАРИОНОВИЧ СТАЛИН.

Еңеүсе халктың тантанаһы

Бөгөн совет халҡы Еңеү көнөн билдәләй. Бөйөк Ватан һуғышы беҙҙең халҡыбыҙҙы һәм уның армияһын мәңгегә дан менән күмде. Тарихта бығаса тиңләм юҡ ауыр булған һуғышта Советтар Союзы Европаны һәм бөтә донъяны герман фашизмы ҡоллоғонан ҡотҡарып алып ҡалды, үҙенең азатлыҡ миссияһын намыҫ менән үтәне һәм шуның менән ул бөтә алдынғы прогрессив кешелектең тарихи хөрмәтен ҡаҙанды.

Фашистик Германия һәм уның союзниктары беҙҙең илебеҙҙе юҡ итергә, беҙҙең халҡыбыҙҙы ҡырып бөтөрөргә теләгәйнеләр. Бөтә донъялағы ҡара реакцияның был иҫәбе совет халҡының ҡаһарманлығы көсөнә бәрелеп селпәрәмә килде. Беҙҙең дөрөҫлөк эше өсөн көрәшебеҙ тулы еңеү менән тамамланды. Совет халҡы һәм уның героик армияһы үҙенең Бөйөк Ватанын дошман һөжүменән һаҡлап алып ҡалыу менән генә сикләнмәне, ул Европаның күп илдәренә азатлыҡ һәм демократия алып килде, агрессия реакция көстәренең тамырынан ҡомшарылыуына килтерҙе.

Был бөтә донъя тарихи әһәмиәткә эйә булған еңеүебеҙҙең сәбәбе бөтәһенән элек Советтар Союзы халыҡтарының героик һәм фидакәр көрәше менән, социалистик ҡоролоштоң ҡеүәтле һәм еңелмәслек булыуы менән аңлатыла. Һуғыш Совет государствоһының, беҙҙең социалистик экономика, политик һәм мораль көстәребеҙҙең ныҡлығын һынау булды. Был һынау ғәйәт уңышлы үтте. Һуғыштың барышы совет ҡоролошонан фашизм режименән генә түгел, бәлки буржуаз демократияһының бөтә формаларынан да өҫтөн тороуын бик асыҡ күрһәтте.

Коммунистар партияһының илебеҙҙе индустриалаштырыу һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу, Совет Армияһын нығытыу, халыҡты коммунистик рухта тәрбиәләү буйынса арымай-талмай үткәргән эше үҙенең ғәйәт яҡшы һөҙөмтәләрен бирҙе. Һуғышта беҙҙең еңеүебеҙ — ул Ленин—Сталин партияһының, уның һуғышҡа тиклем булған политикаһының, һуғыш ваҡытында аҡыллы етәкселегенең тантанаһы. «Партияның ойоштороу эше, — тип күрһәтә иптәш Сталин, — беҙҙең бөтә көстәребеҙҙе һәм средстволарыбыҙҙы дошманды еңеүгә буйһондороп, совет кешеләрен бергә тупланы һәм уларҙың бөтә тырышлыҡтарын дөйөм маҡсатҡа юнәлтте».

Тыуған илебеҙ өсөн ҡаты һуғышта булған был йылдарҙа совет халҡының үҙ Ватанына, үҙ партияһына һәм үҙенең һөйөклө юлбашсыһы иптәш Сталинға сикһеҙ бирелгәнлеге, ҡайнар патриотик рухы ҙур көс булып үҫте. Уның фронттарҙа һәм тылда батырҙарса көрәше тарих битендә иң гүзәл урынды алды. Социалистик ҡоролоштоң бөйөклеге һәм ҡеүәтлелеге Советтар иленең бөтә милләт халыҡтарының дуҫлығының ныҡлығын күрһәттеләр.

Бөтә ил халыҡтары менән бергә Совет Башҡортостаны эшсәндәре лә беҙҙең еңеүебеҙгә үҙҙәренең күренекле өлөштәрен индерҙеләр. Башҡорт халҡының улдары һәм ҡыҙҙары фронтта иң киткес батырлыҡтар күрһәттеләр. «Бөтә нәмә фронт өсөн, бөтә нәмә еңеү өсөн!» — республикабыҙҙың бөтә хеҙмәтсәндәренең девизе булып әүерелде.

Бөйөк Ватан һуғышының еңеү менән тамамланыуына өс йыл тулды. Был ваҡыт эсендә беҙҙең илебеҙҙең ҡеүәте тағы ла нығырак үҫте һәм уның бөтә донъя халыҡтары алдында авторитеты тағы ла нығып төштө. Советтар Союзы үҙенең тыныслыҡ политикаһын эҙмә-эҙ үткәрә барып, яңы һуғыш утын тоҡандырыусыларҙы фаш итеүҙә, демократия өсөн көрәштә баш урында тора. Бөтә азатлыҡ, тыныслыҡ һәм прогресс дуҫтары Советтар Союзы йөҙөндә ныҡлы тыныслыҡтың терәген күрәләр.

Бөйөк еңеү беҙгә еңел генә килмәне. Совет кешеләре үҙ Ватандарын һаҡлап алып ҡалыу өсөн, Европаны фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыу өсөн күп ҡорбандар бирҙеләр. Фашистик илбасарҙар меңәрләгән заводтарҙы, фабрикаларҙы, ҡалаларҙы һәм ауылдарҙы утҡа тоттолар.

Совет кешеләре, тарихи еңеүҙәр менән ҡанатланған хәлдә, һуғыш бөтөү менән тыныс хеҙмәткә тотондолар. Улар ауыр йылдарҙа үҙҙәренең Ватанын һаҡлап алып ҡалып, хәҙер уның данын арттырыу, уның экономик һәм хәрби ҡеүәтен тағы ла көсәйтеү өсөн фидакәр көрәшкә сыҡтылар. Сталинсе яңы биш йыллыҡ һуғыш эҙемталарын тиҙерәк бөтөрөү, экономик һәм культура үҫешенең һуғышҡа тиклемге кимәленә барып етеү һәм уны уҙып китеү өсөн ынтылған илебеҙ хеҙмәтсәндәре өсөн байраҡ булып әүерелде. Һәм һуңғы өс йылда беҙ бик ҙур уңыштарға өлгәштек. Хәҙер инде промышленностебеҙҙең күп тармаҡтары 1940 йылғы кимәлде байтаҡ уҙып киттеләр. Ауыл хужалығының валовой продукция етештереүе һуғышҡа тиклемге иң яҡшы йылдарҙа алынған продукция күләменә тиклем барып етте. Беҙҙең хөкүмәтебеҙ совет һумын нығытыуға иреште.

Быйыл совет халыҡтары тарихи Еңеү көнөн биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылы планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн йәйелдерелгән көрәш шарттарында байрам итәләр. Бөтә ил буйынса биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярыш тулҡыны көндән-көн көсәйә бара. Хәҙер беҙҙә яңы биш йыллыҡ заданиеләрен үтәгән, арттырып үтәгән эшселәр һаны унар, йөҙәр меңәрләп һаналалар. Совет кешеһе хәрби ескеүен хәҙер хеҙмәт еңеүе менән биҙәй.

Колхоз крәҫтиәне, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы, СССР Верховный Советы Президиумының юғары урожай алған өсөн хөкүмәт наградаларын биреү тураһындағы Указы менән рухланған хәлдә, яҙғы сәсеүҙең хәл иткес этабына инде. Колхозсылар, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар, МТС һәм совхоз работниктары быйыл да юғары урожай яулап алыу өсөн арымай-талмай көрәшәләр.

Ошо көндәрҙә генә булып үткән яңы заемға яҙылыу кампанияһының ғәйәт ҙур уңышы совет халҡының үҙ Ватанына мөхәббәтен, мораль-политик берҙәмлеген, ойошҡанлығын тағы бер тапҡыр күрһәтте. Тыуған ил көндән-көн көслө, матур, бай булһын өсөн совет кешеһе бер нәмәһен дә йәлләмәй.

Бөйөк Совет халҡы үҙенең тыуған партияһы — большевиктар партияһы, үҙенең һөйөклө юлбашсыһы һәм атайы иптәш Сталин етәкселегендә яңы еңеүҙәргә — коммунизмға ышанысл ы аҙымдар менән бара.

Еңеүсе халыҡҡа дан! Еңеүсе халыҡтың юлбашсыһы һәм уҡытыусыһы бөйөк Иосиф Виссарионович Сталинға дан!

Еңеү көнө хөрмәтенә

☆ ☆ ☆ ☆ ☆ ☆

Пландан тыш быяла

КРАСНОУСОЛ, 8 май, (Телефон аша). Красноусол быяла заводы коллективы Еңеү байрамы көнөн производствола гүзәл күрһәткестәр менән ҡаршылаҡы.

Быяла эшләүселәрҙең биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышта һалған хеҙмәттәре биш айлыҡ производство планын дүрт айҙа үтәүҙе һәм пландан тыш 169 мең квадрат метр быяла эшләп сығарыуҙы тәьмин итте.

Заводта машина-ванна цехы коллективы иң алда бара. Бында бөтә бригадалар ҙа айлыҡ планды арттырып үтәнеләр. Ә хеҙмәттә гүзәл күрһәткестәр биреүсе стахановсылар йөҙҙәрсә һанала. Мәҫәлән, быяла киҫеү цехының стахановсыһы, коммунист иптәш Александр Верушкин апрел айында нормаһы 205 процентҡа, Петр Курбатов — 249, йәшниктәр эшләү һәм упаковка цехтарының стахановсылары, комсомолец Зәйнулла Рәхмәтуллин — 185, Василий Елкин 201 процентҡа үтәнеләр.

Коллектив май айында ярты йыллыҡ планды үтәү өсөн ныҡышмалы көрәште дауам иттерә.

Йәғфәр Ғәлиев.

Баҫыуҙарҙа стахановсы эш

ЯНАУЫЛ. (Телефон аша). Райондың күпселек колхоздарында массовый рәүештә баҫыу эштәре бара. Ужым сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыу планы ҡыҫҡа срокта арттырылып үтәлде. 1500 гектар урынына, 1964 гектар ужым аҙыҡландырылды һәм 3 мең 104 гектар сәсеүлек тырматылды.

Хәҙер колхоздарҙа бөтә көс иртә культуралар сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә тупланды. 7 майға район буйынса бөтәһе 4000 гектар майҙанда иртә культуралар сәселде.

«Коммунар», «Ҡыҙыл үрнәк» һәм Чкалов исемендәге колхоздарҙа сәсеү айырыуса ойошҡанлыҡ менән бара. «Ҡыҙыл үрнәк» колхозында 180 гектар, Чкалов исемендәге колхозда 150 гектар бойҙай сәселде. Райондың күпселек колхоздары Еңеү көнөн баҫыуҙарҙа стахановсы эш менән ҡаршылайҙар.

Совхоз эшселәренең өлгөлө эштәре

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Раевка бөртөклө ашлыҡ совхозы эшселәре юғары урожай үҫтереү өсөн социалистик ярышта алған йөкләмәләрен үтәү буйынса баҫыуҙа арымай-талмай эшләйҙәр.

Совхоздың бөтә бүлексәләрендә лә ҡыҙыу рәүештә сәсеү эштәре бара. Управляющие иптәш Коряков булған «Красный клин» бүлексәһенең трактористары бер иңсә көн эсендә генә 256 гектар ер һөрҙөләр һәм 100 гектарҙан артыҡ майҙанда бойҙай сәстеләр. «С—80» тракторында эшләүсе тракторист Женин һәм Куҙарин иптәштәр үҙ-ара ярышып эшләп, көн һайын 15 гектар ер һөрәләр.

«Красный клин» бүлексәһе менән ярышыусы «Линде» бүлексәһендә баҫыу эштәре айырыуса ойошҡан рәүештә бара. Бында 285 гектар ер һөрөлдө һәм яҡшы итеп эшкәртелгән 208 гектар майҙанда бойҙай сәселде. Бүлексәнең алдынғы тракторисе Лев Карл ашлыҡ сәсеүҙә смена заданиеһен көн һайын арттырып үтәй, ул 5 майҙа үҙ сменаһында 92 гектар майҙанда ашлыҡ сәсеп, трактористар ярышында беренселекте алды.

Совхоз буйынса бер иңсә көн эсендә генә бөтәһе 700 гектар ер һөрөлдө һәм 350 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде.

Е. Ғәйнетдинова.

„Үрнәк" колхозы иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша). «Үрнәк» колхозы (председателе иптәш Идиәтуллин, партия ойошмаһы секретаре иптәш Әхмәдиев) 9 май көнөн яҙғы сәсеүҙә ҙур уңышлыҡтар менән ҡаршыланы. Яҙғы иртә культуралар сәсеү буйынса государство планын яҡшы сифатлы итеп 7 майға тамамланы. Колхоз алтайлыларға яуап итеп пландан тыш 40 гектар бойҙай һәм 30 гектар һоло сәсеү йөкләмәһен үтәй башланы. Колхозсылар яҙғы сәсеү-һөрөү эштәрендә ҙур ойошҡанлыҡ күрһәтәләр. Колхоз коммунистары һәр эштә алдынғы сафта торалар. Мәҫәлән, партия ойошмаһы секретаре Әхмәдиев һәм коммунистарҙан Ғимаев һәм Фәтхуллин иптәштәр сәскес машинала эшләп, көндәлек нормаларын 125-әр процентҡа үтәйҙәр. Һөрөүселәрҙән Ғиниәтуллин Рәхим, Лотфуллин Сәлихьян, Хәсәнов Сәғит, Басыров Әнүәр һәм Зиннәтуллин Ғәбитьян иптәштәр көндәлек һөрөү нормаларын 146-шар процентҡа үтәйҙәр.

— Беҙ быйыл яҙғы сәсеүҙе, — ти иптәш Идиәтуллин, — бөтә культуралар буйынса ла срогынан алда, 20 майға тамамлаясаҡбыҙ.

В. Н. Вощинин,
ВКП(б)-ның Туймазы райкомы пропагандисе.

График арттырылып үтәлә

КУШНАРЕНКО. Фашистик Германияны Еңеү көнөн Кушнаренко районы колхозсылары, трактористары баҫыуҙарҙа стахановсы эш менән билдәләйҙәр. Бөтә колхоздарҙа ла сәсеү ҡыҙыу бара.

Айырыуса 7 май көнө юғары хеҙмәт күтәрелеше шарттарында үтте. Баҫыуҙарҙа 95 трактор, 1270 ат, 827 баш мөгөҙлө эре мал эшләне. Тик бер көн эсендә генә 2710 гектар майҙанда иртә культуралар сәселде, шуның 1984 гектары бойҙай. Сәсеү графигы арттырылып үтәлде.

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Малсылыкты уңышлы үҫтереү өсөн күсмә Ҡыҙыл Байраҡ Сакмағош районына бирелде

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты 1948 йылдың I кварталында колхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереү буйынса райондарҙың социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡараны. Колхоздарҙа общественный малсылыҡты үҫтереү өсөн социалистик ярышта Сакмағош районы (район Советы исполкомы председателе иптәш Еникеев, ВКП(б) район комитеты секретаре иптәш Ғәләүетдинов) еңеүсе итеп табылды. Был районға Ҡыйғы районынан алынып БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Шулай уҡ малсылыҡ алдынғыларын бүләкләү өсөн 10 мең һум күләмендә аҡсалата премия бирелде.

Общественный малсылыҡты үҫтереүҙә Белокатай һәм Ҡариҙел райондарының эштәре уңышлы, тип табылды.

Фашистик Германияны еңеү көнө

1941—1945 йылдарҙағы Бөйөк Ватан һуғышы илебеҙ өсөн ҡаты һынау булды һәм совет общественный һәм государство ҡоролошо өсөн, Советтар Союзының Ҡоралллы Көстәре өсөн ҡаты экзамен булды.

Фашистик Германия һәм уның союзниктәре социализм илен юҡ итергә, миллионлаған совет кешеләрен ҡырырға, ә тере ҡалғандарын ҡол итергә теләгәйнеләр. «Беҙ Россияны башҡа бер ваҡытта ла башын ҡалҡыта алмаҫлыҡ итеп юҡ итербеҙ»,—тине Гитлер. Халыҡ-ара реакция фашистик башлыҡтың был һүҙҙәрен шатлыҡ менән ҡаршы алды. Бөтә донъялағы реакцион элементтар, бигерәк тә Англия, АҠШ һәм Франция империалистәре, Гитлер Германияһына ҙур өмөтләр бәйләнеләр. Улар, Германия Советтар Союзына шундай удар яһар, был удар уны юҡ итмәгәндә лә, һәр хәлдә сериоз рәүештә хәлһеҙләндерер, тип иҫәп иттеләр һәм беҙҙең социалистик илебеҙҙең бөтә донъя халыҡтарына булған йоғонтоһон өҙергә иҫәп иттеләр. Империалистар һәм реакционерҙар Гитлер Германияһына Европала революцион эшсәләр хәрәкәтен һәм демократик хәрәкәтте тар-мар итергә һәм капиталистик системаның хәлен ҡаҡшыртырға һәләтле көс итеп ҡаранылар.

Гитлер Германияһы Советтар Союзына ҡаршы үҙ власе аҫтындағы бөтә государстволарҙың кеше һәм материаль ресурстарын ташланы. Швеция, Швейцария һәм Төркиә кеүек илдәр промышленность продукцияһы, тимер рудаһы һәм башҡа һәр төрлө хәрби материалдар биреүсе илдәр булып әүерелделәр.

Советтар Союзына һөжүм иткәндә Гитлер Германияһының тәүҙә байтаҡ ҡына өҫтөнлөктәре: совет сиге буйынса йәшерен рәүештә килтерелгән әҙер 170 дивизияһы, хәҙерге заман һуғышын алып барыуҙа ике йыллыҡ тип әйтерлек тәжрибәһе, танкыларҙа һәм самолеттарҙа һан яғынан өҫтөнлөгө, һәм, аҙаҡ килеп, уларҙың ҡапыл булыу өҫтөнлөгө бар ине. Немец ғәскәрҙәре, тотош Европаны тип әйтерлек баҫып алғас, үҙҙәренең еңелмәҫлегенә ышаналар ине. Германия генеральный штабы СССР-ға ҡаршы «йәшен тиҙлегендәге һуғыш» планын эшләне. Гитлер үҙенең генералдары алдына алты—һигеҙ аҙна эсендә Ҡыҙыл Армияның төп көстәрен юҡ итергә һәм Архангельск—Волга—Әстрахань линияһына сығырға, тигән бурысты ҡуйҙы.

Ләкин совет-герман фронтындағы операциялар баштан уҡ Гитлер иҫәп иткәнсә йәйелмәнеләр. Совет халҡының ойошҡанлығы, батырлығы һәм ҡөйрәтлеге, уның армияһының ныҡлығы, Сталиндең стратегик гениe гитлерсе штабтың календарь расписаниеһен юҡҡа сығарҙылар. 1941 йылдың октябренә, йәғни, фашистик «стратегтарҙың» иҫәптәре буйынса совет Ҡоралллы Көстәре күптән инде бөтөргә тейеш булған ваҡытҡа, немец-фашист армияһы, бер нисә миллион кешеһен һәм бик күп һанда һуғыш техникаһын юғалтып, һуғыштың башындағы кеүек үк үҙенең авантюристик маҡсаттарынан алыҫ ине әле.

Совет халҡының һәм Ҡыҙыл Армияның һуғышсанлыҡ һәләтлеге кәмемәне, ә киреһенсә, көндән-көн үҫә барҙы. «Халыҡтың бөтә көсө — дошманды тар-мар итеүгә!» — ошо лозунгы аҫтында Ленин—Сталин партияһы совет кешеләрен немец-фашист илбаҫарҙарға ҡаршы бөйөк бөтә халыҡ көрәшенә туплады.

Ҡеүәтле совет тылына таянып, беҙҙең армиябыҙ иптәш Сталин етәкселегендә актив оборона тактикаһын тормошҡа ашырҙы. Был тактика дошманды хәлһеҙләндереү, уның йәнле көсөн һәм техникаһын максималь рәүештә ҡырыу һәм контр һөжүмгә күсеү өсөн шарттар әҙерләү маҡсатын күҙәтте. Һуғыштың тәүге айҙарында оборона һуғыштарында совет ғәскәрҙәренең ҡаршылыҡ күрһәтеүе иҫ киткес ҙур булды. Был турала, барыһынан элек, Киев, Харьков, Смоленск өсөн булған ҡаты һуғыштар, Одессаны, Севастополде, Ленинградты героик обороналау дәлилләй. Был ҡан ҡойошло һуғыштарҙа немецтарҙың бик ҙур юғалтыуҙары ла шул турала һөйләйҙәр.

Немецтарҙы Мәскәү янында тар-мар итеү шул тиклем ҙур политик һәм стратегик әһәмиәткә эйә булды, совет башҡалаһынан йөҙҙәрсә километрҙарға кире ырғытылған дошман ҡапыл һәм көтөлмәгәндә һөжүм итеүҙә булған өҫтөнлөгөн юғалтты. Һуғыш шундай осорға инде, был осорҙа һуғыштың һөҙөмтәһе даими хәрәкәт итеүсе факторҙар менән — илебеҙ тылының ныҡлығы, армияның мораль рухы, дивизияларҙың һаны һәм сифаты, армияның ҡоралланыуы, начальство составының ойоштороусылыҡ һәләтлектәре менән хәл ителә ине. Мәскәү янындағы һуғыш беҙҙең ғәскәрҙәребеҙҙең обороналаныуға ғына түгел, бәлки ҡыйыу һөжүмгә лә булдыҡлы көс булып үҫкәнлеген күрһәтте.

1942 йылда, союзниктарҙың Европала икенсе фронтты асыуҙы һуҙыуҙарынан файҙаланып, Гитлер совет-герман фронтына үҙендә булған 256 дивизияның 240 дивизияһын ташланы. Немецтарҙың был йәйге һөжүменең маҡсаты Мәскәүҙән көньяҡтараҡ көнсығышҡа удар яһап Волгаға сығыуҙан, унан һуң башҡаланы көнсығыш яҡтан Волга һәм Урал тылынан айырыуҙан һәм уны баҫып алыуҙан торҙо.

Воронеж янында уңышһыҙлыҡҡа осрағас немец ғәскәрҙәре командованиеһы үҙенең иғтибарын Сталинградҡа туплады. Ләкин немецтарҙың 500 танкыһы һәм 11 дивизияһы сталинградлыларҙың ныҡышмалы героик оборонаһын емерә алманы. Иптәш Сталиндең: «Сталинград дошманға бирелмәҫкә тейеш» тигән приказын үтәп, беҙҙең воиндарыбыҙ һәр бер өй, һәр бер аҙым ер өсөн һуғыштылар. Ҡаланы һаҡлап алып ҡалырға ант итеп, улар был анттарында торҙолар. Үҙҙәренең героик оборонаһы менән сталинградлылар иптәш Сталинға Сталинград янында туҡтатылған дошман ғәскәрҙәренә емергес удар әҙерләргә һәм был ударҙы яһарға мөмкинлек бирҙеләр. Биш көн эсендә, 19 ноябрҙән алып, Сталинградтан төньяҡтараҡ һәм көньяҡтараҡ немецтарҙың 22 дивизияһы ҡамап алынды һәм һуңынан юҡ ителде.

Сталинград өсөн булған һуғыш — хәрби искусствоның сәскәһе. Был һуғыш алдынғы совет хәрби фәненең камиллашыуының яңы миҫалы булды. Бында өлгәшелгән тарихи еңеү — совет стратегияһының һәм тактикаһының гүзәл тантанаһы дошмандың уйҙарын үтәнән-үтә асып биреүсе, уның йомшаҡлығынан һәм авантюристик стратегияһынан файҙаланыусы бөйөк полководец иптәш Сталиндең гениаль планының һәм тәрән аҡыл менән алдан күрә белеүенең тантанаһы булды. Сталинград янында еңелеү Гитлер армияһының ҡояшының байыуы булды. Бынан һуң немецтәр хәле төҙәлә алманылар. Инициатива Совет Армияһына күсте.

Совет Армияһының хәрби искусствоһы Бөйөк Ватан һуғышы барышында яңы, тағы ла юғарыраҡ баҫҡысҡа күтәрелде. 1943 йылдың йәйендә немецтәр Орел һәм Курск районында һөжүм башланылар. Ләкин совет ғәскәрҙәре, Гитлерҙың күп һандағы бронетанк дивизияларының ҡотороңған атакаларын кире ҡағып, бөтә фронт буйлап үҙҙәре һөжүм итеүгә күстеләр. Немецтәрҙе совет еренән массовый рәүештә ҡыуып сығарыу башланды. Был көндәрҙә миллионлаған совет кешеләре фашистик ҡоллоҡтан ҡотҡарылды.

1943 йыл совет тылының эшендә лә шулай уҡ һынылыш йылы булды. Халыҡтың тырышлығы менән барлыҡҡа килтерелгән, тиҙ рәүештә үҫә барыусы хәрби хужалыҡ беҙҙең хәрби техникабыҙҙың немец хәрби техникаһына ҡарағанда һан һәм сифат яғынан өҫтөнлөгөн тәьмин итте. Һуғыштарҙа сыныҡҡан кадровый Совет Армияһы дошманды бөтөнләй һәм тамам тар-мар итер өсөн кәрәк булған бөтә нәмәне алды. Тылдың эшендә 1943 йыл совет халҡы һәм большевиктар партияһы өлгәшкән һынылыш һуғыштың артабан барышына бик ҙур йоғонто яһаны.

1944 йыл Совет Армияһының хәл иткес еңеүҙәре йылы булды. Советтар Союзы территорияһын немец-фашист илбаҫарҙарҙан азат итеп, беҙҙең ғәскәрҙәр һуғыш хәрәкәттәрен дошман территорияһына күсерҙеләр. Совет Армияһының ударҙары аҫтында Германияның союзниктәре — Финляндия, Румыния, Болгария капитуляция яһанылар, уларҙың халыҡтары фашизмға ҡаршы һуғышҡа башланылар. Совет Армияһы Гитлер Германияһы тарафынан ҡол ителгән Европа халыҡтарын азат итеүгә тотонҙо.

Был ваҡиғаларҙың бәреһе Советтар Союзының союзниктар ярҙамынан башҡа, үҙ көстәре менән генә лә фашистик йыртҡысты еңә аласағын һәм Европа халыҡтарын азат итә аласағын дәлилләне. Һәм был хәл Америка хөкүмәтен үҙ ғәскәрҙәрен Төньяҡ Францияға төшөрергә һәм, аҙаҡ килеп, икенсе фронтты асырға мәжбүр итте.

Һуғышты оҙаҡҡа һуҙыу, Советтар Союзын хәлһеҙләндереү һәм фашистик государстволы тулыһынса тар-мар ителеүҙән ҡотҡарып алып ҡалыу өсөн Англияның һәм АҠШ-тың реакцион круглары бик ныҡ тырыштылар.

Гитлер инглиздәрҙең һәм американлыларҙың уйҙарын бик яҡшы аңланы. Һәм тап шуға күрә лә, Совет Армияһының алға барышын туҡтатырға теләп, ул ғәскәрҙәрен көнбайыштағы фронттан алып көнсығышҡа туплады ла.

Гитлерҙың һәм уның АҠШ-тағы һәм Англиялағы реакцион дуҫтарының иҫәптәре барып сыҡманы. Совет Армияһы 1945 йылдың ғинуар урталарында, Гитлерҙың 220 дивизияһының ҡаршылығын еңеп, Польшаны, Венгрияны, Чехословакияны, Австрияны азат итте һәм Берлинға барыу юлдарына сыҡты. Совет Армияһының еңеүле байраҡтары Европа үҙәгендә елберҙәне.

1941 йылдың 22 июнендә башланған иҫ киткес ҙур көрәштең һуңғы акты башланды. Тәрән һәм киң йылғалар ҙа, ҡеүәтле нығытмалар ҙа, эсэсовсыларҙың ярһыулы ҡаршылыҡтары ла — бер нәмә лә атака яһаусы совет ғәскәрҙәрен туҡтата алманы. 1945 йылдың 25 апрелендә беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ Берлинға штурм башланылар, ә 8 майҙа герман командованиеһының вәкилдәре һис һүҙһеҙ капитуляция яһау тураһындағы актыға ҡул ҡуйҙылар. Дүрт йыл тип әйтерлек дауам иткән көсөркәнешле һәм ауыр көрәш беҙҙең еңеүебеҙ менән тамамланды. Совет халҡы һәм уның Ҡоралллы Көстәре фашистик Германияны тар-мар иттеләр һәм уның армияһын юҡ иттеләр.

1945 йылдың 9 майында, Германияны еңеү көнөндә — бөтә халыҡ байрамында иптәш Сталин совет халҡына мөрәжәғәт итеп былай тине: «Ватаныбыҙҙың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо хаҡына беҙ биргән ҙур ҡорбандар, һуғыш барышында беҙҙең халҡыбыҙ кисергән иҫәпһеҙ күп михнәттәр һәм ғазаптар, тылда һәм фронтта Ватан хаҡына бирелгән көсөркәнешле хеҙмәт — әрәмгә китмәне һәм дошманды тулы еңеү менән тамамланды».

Гитлер Германияһының еңелеүе уның көнсығыштағы союзнигы — империалистик Японияның яҙмышын алдан билдәләне.

Бөйөк Ватан һуғышының еңеүле тамамланыуы беҙҙең халҡыбыҙҙың берҙәмлегенең, совет общественный һәм государство ҡоролошоноң йәшәүгә һәләтлегенең һәм ныҡлығының бөйөк демонстрацияһы булды. Ленин һәм Сталин күрһәтмәләре буйынса большевиктар партияһы тарафынан үткәрелгән экономик һәм социаль бик тәрән үҙгәрештәр, ҡайтанан ҡороуҙар СССР-ҙы ҡеүәтле социалистик державаға әүерелдерҙеләр. Һуғыш барышында Совет Армияһы үҙенең личный составының мораль-боевой сифаттары менән, боевой техникаһының юғары кимәле менән, командкадрҙарының әҙерлекле булыуҙары менән, хәрби искусствоһы менән үҙенең дошманынан — бик көслө капиталистик армияларҙан өҫтөнлөгөн дәлилләне.

Совет халҡының тәрән аҡыллы юлбашсыһы һәм остазы, гениаль полководец һәм совет хәрби фәнен тыуҙырыусы иптәш Сталин Бөйөк Ватан һуғышында совет Ҡоралллы Көстәренең данлы еңеүҙәрен рухландырыусы һәм ойоштороусы булды.

Реакция көстәрен бөтә донъя күләмендә тарихи әһәмиәтле еңеүгә өлгәшеп, совет халҡы тыныс социалистик төҙөлөш эшенә тотонҙо. Гитлер Германияһын еңгәндән һуң үткән өс йыл эсендә беҙҙең илебеҙ халыҡ хужалығын һуғыштан һуң аяҡҡа баҫтырыу һәм артабан үҫтереү эшендә сериоз уңыштарға өлгәште. Сталинсе дүртенсе биш йыллыҡ уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыла бара. Большевиктар партияһы тарафынан рухландырылған совет халҡы уны дүрт йылда үтәргә ҡарар итте. СССР ышаныслы рәүештә коммунизмға бара.

Демобилизациянан һуң һәм ярыһан кәмегән һәм тыныс хәлгә күскән Ҡоралллы Көстәребеҙ үҙ халҡы менән бергә хәҙер көсөркәнешле боевой һәм политик уҡыу менән шөғөлләнә. Совет Армияһы һәр ваҡыт боевой әҙерлек хәлендә тора. Ул СССР халҡының тыныс хеҙмәтен, совет государствоһының интерестарын уяу рәүештә һаҡлай.

А. Ковалевский.
Генерал-майор.

КИНО

„Өсөнсө удар“

«Өсөнсө удар» бөйөк Ватан һуғышына арналған фильм. Ул 1944 йылда Ҡырымда немец ғәскәрҙәрен тар-мар иткәндә, совет воиндарының мораль көсөн, совет полководецтарының ижади фекерен күрһәтә. Фильм, шулай уҡ, Сталин стратегик планының тәрән аҡыллы булыуын һәм совет хәрби искусствоһының немец хәрби искусствоһынан өҫтөн торғанлығын күҙ алдына баҫтыра.

Һалдаттарҙың иң популяр йырҙарынан һаналған «Изге һуғыш» йыры яңғырай. Фильм өсөн был увертюра шикелле һәм был йыр тамашасыны Кремлгә алып инә. Кремль... Бында бөйөк Сталин. Бында беҙҙең бар еңеүҙәребеҙҙең сығанағы, шатлығы һәм ошонда өсөнсө удар тураһындағы уй ҙа тыуа һәм стратегик план да әҙерләнә.

Иптәш Сталиндең эш бүлмәһендә Армия генералы Антонов 4-се Украина фронтындағы хәлде һөйләй. Иптәш Сталин бик иғтибар менән тыңлай, Ҡырымдың әһәмиәтенә баһа бирә һәм уның оборона средстволары, нығытмалары тураһында аңлата.

— Күп стратегтарҙың һәм политиктарҙың күҙҙәре Ҡырым районына төбәлгәндәр. Был Балканға, Ҡара диңгеҙгә асҡыс. Ҡырымға барып инеү — Па-де-Каленән кәм булмаған һыу ҡомасаулығын үтеп сығыу һәм Синашта ла, Перекопта ла туҡталып нығыу тигән һүҙ. Минеңсә, улар бында атлантик вал тип аталған нәмәнән бер нисә тапҡыр көслөрәктәр.

Фильм беҙҙе һуғыш хәрәкәттәре барған ергә алып китә. Беҙҙең алда дошман нығытмалары. Ҡырымда 17-се немец армияһы менән командовать итеүсе генерал-полковник Енекке һәм атлантик валдан Ҡырымға күсерелгән генерал Сикст нығытмаларҙы күреп шатланалар һәм генерал Енекке ул нығытмалар аша бер кемдең дә үтеүе мөмкин булмаҫағына ышана. Был ышаныуға яуап биргән шикелле, Совет Армияһының Ҡырым ярым утрауының төньяғында һәм Керчь районында һөжүме башлана.

Иптәш Сталин һуғыш барышының һәр аҙымын күҙәтә, бөтә ваҡиғаларҙың деталдәре менән ҡыҙыҡһына, һәр бер соединение командирының эшен белә.

4-се Украина фронты штабына ебәрелгән Верховный Баш Командованиеның уполномоченныйы иптәш Василевский ставка тарафынан телефонға саҡырыла. Штабтағылар Василевскийҙың кире әйләнеп килеүен түҙемһеҙлек менән көтәләр. Ул килә, уны генералдар урап алалар.

— Иптәш Сталин беҙҙе төҙәтте, — ти Василевский. — Атаканы туҡтатырға, яулап алынған рубежҙарҙа нығырға һәм ставканың киләсәк күрһәтмәләрен көтөргә бойороҡ бирелгән.

Атака туҡтатылды. Дошмандар шатлана. Улар Совет Армияһы көсһөҙ һәм нығытмаларҙың үтә алмаҫлыҡ булыуҙары тураһында ғына уйлайҙар.

Шул ваҡытта иптәш Сталин Ворошилов һәм Василевский менән берлектә киләһе 1944 йылдың стратегик планын тикшерә. Бында иптәш Сталин обстановкаға анализ яһап, дошмандың Ҡырымды тотоп тороуы фәҡәт политик уй менән булғанлығы тураһындағы фекергә килә. Ҡырымды ҡалдырыу немецтәр өсөн бик уңайһыҙ хәл тыуҙыра. Ҡырым Балканға ҡапҡа әсә. Унан һуң беҙ үҙебеҙҙең Севастополь һәм Ҡара диңгеҙҙең хужалары булабыҙ.

Планды тикшергән саҡында бөтә ваҡ деталле моменттар ҙа иҫкә алына. Иптәш Сталин, Ҡырымға бикләнгән немецтәр аңында йәшәгән оборона идеяһын ҡасыу идеяһы менән алмаштырырлыҡ хәл тыуҙырыу кәрәклеге тураһында күрһәтмә бирә. Шуның өсөн дә иптәш Сталин 3-сө Украина фронты ғәскәрҙәре Одессаға килеп еткәс кенә Ҡырымды штурмлай башлауҙы тәҡдим итә.

Совет Армияһының тын тороуы арҡаһында дошмандар — генерал Енекке лә, һалдаттар ҙа бошоналар. Һалдаттар үҙҙәренең ниндәй ҡапсыҡ эсендә ултырғандарын, икенсе Сталинград ҡабатланасағын төшөнә башлайҙар.

Фильм беҙҙе Симферополь һарайының ҙур залына алып килә. Һәм бында Ҡырым байлығына ҡыҙығып килгән Төркиә политиктәрен күрабеҙ. Фильмда дошман лагере эсендә булған, уны ҡаҡшатҡан ҡапма-ҡаршылыҡтар бик оҫта күрһәтелгәндәр.

Ленинград, Новгород янында немец армияһының тар-мар ителеүе тураһында Енекке хәбәр ала. «Ленинград... Сталинград... — ти ул,—киләсәге ниндәй град? Ә бында, көньяҡта — поль. Мелитополь. Симферополь... Севастополь»...

3-сө Украина фронты немецтәрҙең Никополь группаһын тар-мар итә. Был ваҡытта 4-се Украина фронты киләсәк операцияларға сериоз әҙерлек алып бара.

1944 йылдың 8 апрелендә 4-се Украина фронты ғәскәрҙәре һөжүм башлай. Онотолмаҫлыҡ иҫ киткес бәрелеш картиналары күҙ алдынан үтә. Бигерәк тә Сапун-Гораны штурмлау һәм яулап алыу, еңеү байрағын элеү картиналары дәрәслек менән бирелгән. Шулай итеп, башланған һөжүм Ҡырымды азат итеү менән тамамлана — немецтәр һәм румындар Ҡырымдан ҡасалар.

«Өсөнсө удар» — совет кинематографияһының ҙур фильмдарының береһе. Фильм, совет хәрби оператив искусствоһының, манёвр тактикаһының өҫтөн торғанын күрһәтә, Сталин мәктәбе полководецтәре маршалдарҙың, генералдарҙың ғәскәр менән юлбашсылыҡ итә белеүҙәре, Сталинград һуғыштары тәжрибәләрен ҡуллана алыуҙары, стратегик планды тәрәнлек менән аңлауҙары тураһында һөйләй был фильм. Һалдаттарҙың образдарында совет кешеләренең иң яҡшы сифаттары тупланған.

Фильмда немецтәр көслө дошман итеп күрһәтелгән, шул уҡ ваҡытта немец тактикаһының шаблон, фашист Германияһының йомшаҡ булыуын күрһәтәләр.

Сценарий авторы Аркадий Первенцов һәм режиссер Игорь Савченко үҙ алдарына ҡуйылған бурысты тулыһы менән аңлағандар һәм тәрән идеялы көслө фильм тыуҙырғандар.

Фильмде ҡарағандан һуң Ватан һуғышының иң ауыр бурыстарын үҙ өҫтөнә алған бөйөк Сталин образы, һуғышта ла, хеҙмәттә лә бөтә еңеүҙәрҙең гений аҡылы менән барлыҡҡа килгәнлеге күҙ алдына баҫа. Юлбашсы һәм халыҡ ҡаҡшамаҫ бер бөтөн көс булып яңғырай

Назар Нәжми.

Өс районның алдынғыларына наградалар тапшырылды

БӨРӨ. (Телефон аша). 5 май көнө байрамса биҙәлгән район культура йортона Бөрө, Мишкә һәм Дүртөйлө райондарының ауыл хужалығы алдынғылары йыйналдылар. Улар — үҙған йыл колхоз баҫыуҙарында юғары урожай үҫтереүселәр, хөкүмәт тарафынан наградланыусылар. Улар араһында Социалистик Хеҙмәт Геройҙары — Базан МТС-ының өлкән механигы Ломодуров, трактор бригадаһы бригадиры Рябов, МТС-тың өлкән агрономы Титов иптәштәр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Нигмәтжанов наградланыусыларға мөрәжәғәт итеп, уларҙың үҙған йылда юғары урожай өсөн көрәштәге батыр хеҙмәттәренең юғары баһаланыуы тураһында һөйләне. Бынан һуң СССР Верховный Советы Президиумы Указы уҡылды һәм наградланыусылар бер-бер артлы сәхнәгә күтәрелделәр. Иптәш Нигмәтжанов иң тәүҙә Социалистик Хеҙмәт Геройҙары Ломодуров, Рябов һәм Титов иптәштәргә Ленин ордендәре, «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медалдәре тапшырҙы.

Юғары урожай алыуҙағы батыр хеҙмәттәре өсөн Базан МТС-ының тракторисе Байдимиров, Берия исемендәге колхоздың председателе Бочкарев, баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры Десяткин, М. Горький исемендәге колхоздың звеноводы Дьяконова, Базан МТС-ы директоры Леонтьев, Мишкә районы «III Интернационал» колхозы председателе Зорин, был колхоздың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары Новиков һәм Рябухин иптәштәргә Ленин ордендәре бирелде. Бөрө, Мишкә һәм Дүртөйлө райондары буйынса наградланған ауыл хужалығы алдынғыларынан бөтәһе 152 кешегә ордендәр һәм медалдәр тапшырылды.

Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Титов трибунаға күтәрелеп, бөтә наградланыусылар исеменән, большевиктар партияһына һәм Совет Хөкүмәтенә, бөйөк Сталинға рәхмәт әйтте. Ул үҙ сығышында Базан МТС-ы коллективының 1948 йылда 13.500 гектар майҙандың һәр гектарында 15-әр центнер урожай үҫтерергә, шартлы һәр бер тракторға 700-әр гектар ер эшкәртергә йөкләмә алыуын белдерҙе. «III Интернационал» колхозы председателе иптәш Зорин сығыш яһап, быйыл 400 гектар майҙандың һәр гектарынан кәмендә 14-әр центнер урожай үҫтереү өсөн баҫыуҙарҙа эштәрҙең йәйелдерелеүен һөйләне.

М. Гуревич.

Наградаға юғары урожай өсөн көрәште көсәйтеп яуап бирәләр

ДӘҮЛӘКӘН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Ҡаҙанғол бөртөклө ашлыҡ совхозы директоры иптәш Мөбәрәк Ҡурамшин баҫыуҙа эшләүселәргә шатлыҡлы хәбәр килтерҙе.

— Совхоз работниктәренән 14 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланған, — тигән хәбәр бөтә баҫыуға таралды.

Күп тә үтмәне митинг башланды. Беренсе һүҙ Ленин ордене менән наградланған иптәш Ҡурамшинға бирелде.

— Беҙ үҙған йыл урожайҙы күтәреүҙә ҙур ғына уңыштарға ирештек. 118 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 26,49-ар центнер урожай алдыҡ. Айырым бригадалар унан да юғарыраҡ урожай алыуға өлгәштеләр. Беҙҙең хеҙмәтебеҙ юғары баһаланды. Беҙ был уңыштар менән тынысланып ҡалмаясаҡбыҙ. Тыуған илебеҙ беҙҙән тағы ла күберәк игенетештереүҙе талап итә. Беҙ был наградаға быйыл бөтә совхоз буйынса юғары урожай алыу менән яуап бирергә тейешбеҙ, — тине ул һәм бөтә совхоз работниктәрен яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн эшкә саҡырҙы.

Совхоз коллективы уның саҡырыуына ҡушылып, быйыл бойҙай сәсеү майҙанын 675 гектарға арттырырға һәм 1700 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан кәмендә 100-әр бот, 751 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға һүҙ бирҙе.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланыусы Петр Лапонов 107 гектар майҙанда бойҙайҙың һәм 150 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарында 180-шәр бот урожай үҫтерергә йөкләмә алып, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле Иван Чикота бригадаһы менән социалистик ярышҡа сыҡты.

Медалдәр менән наградланыусы трактористарҙан Василий Тимофеев, Алексей Арютин иптәштәр баҫыуҙа стахановсы эш өлгөләре күрһәтәләр. Улар 90 гектар урынына, сменаға 180 гектар ер тырматалар.

Ғ. Идрисов.

БЕҘ ГЕЛ ЕҢДЕК, ЕҢӘБЕҘ ҺӘМ ЕҢЕРБЕҘ!

Ғәйнан Әмири

Беҙ гел еңдек, еңәбеҙ һәм еңербеҙ!

Беҙ гел еңдек, еңәбеҙ һәм
еңербеҙ,
Еңеүселәр иле беҙҙең илебеҙ,
Маҡсатыбыҙ изге, яҡты, юғары,
Балҡый алда, ҡояш кеүек,
нурланып!
Беҙҙең, белмәй һис тә арыу-
талыуҙы,
Тау-таштарҙы айҡап, алға
барыуҙы
Күреп, ғорур тау йылғаһы таң
ҡала,
Беҙ бойорған яңы ярҙарҙан аға;
Ҡая-тауҙар ҡуйындарын асалар,
Ҡом сахралар әйләнәләр баҡсаға;
Өҫкә ҡалҡа тәрән девон ҡатламы,
Ишетеп ерҙә беҙҙең аяҡ атлауҙы.
Диңгеҙҙәр һәм океандар артында
Ҡалтырана, беҙҙе күреп, ҡарт
донъя,
Күпме генә олоһа ла ҡоторон,
Юҡ, юҡ инде, һис юҡ уға
ҡотолоу!
Беҙҙең ҡулда бөгөнгө һәм
киләсәк,
Большевизм идеяһы еңәсәк;
Ҡояш нуры ҡара төндө юҡ итә,
Барлыҡ юлдар коммунизмға илтә.
Беҙ гел еңдек, еңәбеҙ һәм
еңербеҙ,
Еңеүселәр иле беҙҙең илебеҙ,
Беҙ — Сталин гвардияһы,
легионы,
Сталин — илдең байрағы һәм даны!

Ғ. Рамазанов

Беҙҙең байраҡ

Күңелдәрҙә күнегелгән шулай:
Май — гүзәле бөтә айҙарҙың,
Һәр яңыһы ямьлыраҡ була
Бөтәһенән уҙған майҙарҙың.
Май үҫтергән асыҡ урмә гөлдәй
Алһыуланып яҙғы таң атты,
Һаман үргә, үргә, үргә үрләй
Байраҡтарҙың алһыу ҡанаты.
Һәм беҙ күреп белгән төрлө
яҡтан,
Һәм күрмәгән әллә ҡайҙарҙан,
Бөтә донъя күҙе ошо саҡта
Ҡарап тора Ҡыҙыл майҙанға.
Күңелдәрен мавзолейгә текәп
Ябай кешеләре донъяның,
Атаға ул рәхмәт әйткән кеүек,
Юлбашсының ҡыҫа ҡулдарын.
Тыуған ил гимны яңғырағанда
Донъя тыңлай, тыңлай бар
ерҙәр,
Ант итәбеҙ шул саҡ ҙур
Ватанға,
Атай, һиңә, һиңә, партия!
Ант итәбеҙ: кисәгенән нығыраҡ
Ваҡыт аҙымын уҙып атларға,
Ватан намыҫын ныҡ һаҡлаған
һымаҡ,
Донъя тыныслығын һаҡларға!
Белһен дошман:
Ҡыҙыл байраҡтарҙан
Күргән саҡта сүкеш-ураҡты,
Онотмаһын,
Ҡайнар ҡандар тамған
Рейхстагҡа элгән байраҡты!
Мәңге яҙға илтә бар юлдары
Беҙ йәшәгән бөйөк быуаттың,
Үрләй үргә, үрләй гел юғары
Ал байраҡтың алтын ҡанаты!

С. Ҡулибай

Ыласын күҙҙәре

(Баллада)

Сөм ҡара ине күҙҙәре
Йәшлек дуҫымдың минең,
Йәшәү юлын башлағанда
Бергә атлаған инек.
Егеткә һөнәр һайлашҡан
Шундай сөм ҡара күҙҙәр,
Ул ыласын ҡоштан бейек
Күктең өҫтөндә йөҙгән.
Егет болон киңлегенән
Зәңгәр сәскәләр өҙгән,
Сөм ҡара күҙен тегәһә,
Ҡараһын юйған төндәр.
Оло йәки сабый булған
Яҡты сырайлы йөҙҙәр,
Донъяның күп мәғнәләрен
Тапҡан сөм ҡара күҙҙәр.
Ҡыҙыл майҙан парадында
Егет сафтарҙа уҙған,
Сөм ҡара күҙҙәр даһиҙан
Алған һүрелмәҫ нурҙар.
Һәм ул илдең иркәнлеген
Күҙ күреп бөтмәҫ ерҙән,
Ҡарап, тапып ныҡ һөйөргә,
Иң бейек күккә менгән.
Ыласын күҙҙәре шикелле,
Үткән сөм ҡара күҙҙәр,
Бик һауанан, бик бейектән
Дошман эҙҙәрен күргән.
«Ил» ҡанатлы ыласын булып,
Егет һауала йөҙгән,
Башын йөнсеп хас дошмандың
Сигер юлдарын өҙгән.
Сөм ҡара күҙле егеттең
Йөрәге ҡыйыу өсөн,
Күкрәге өҫтөн нурлаған
Лениндең һүнмәҫ төҫө.
Яуҙың утлы көнө булған,
Илдең данлы бурыстарын
Үтәргә барған егет.
Ә тик шрапнель уттары
Ыласындың ҡанаттарын
Ҡайырып өсөп сайҡаған,
Ләкин егет бомбаларын
Целгә күҙәп ташлаған.
Шул минутта ошондай хәл
Егеткә дусар булған:
Күҙен сағылтып, томалап,
Утлы ялҡындар уҙған...
Ләкин егет осҡан юлын
Йөрәге аша тапҡан,
Почта күгәрсене кеүек,
Әйләнеп, кире ҡайтҡан.
— Ах, донъяны аҙ күргән, тип
Үкенеү булыр битәр,
Нуры сөм ҡара күҙҙәрҙең
Бәхете һүнмәҫ икән.
Дауалаған ул күҙҙәрен
Һәм донъяның яҡтыһын,
Ыласындай күккә менеп,
Күргән еңеү шатлығын.

Советтар Союзы геройҙарынан бер төркөм!
Һүрәттә (түбәндән һулдан уңға): А. Полунин, М. Гәрәев, Ғ. Ғималетдинов, Н. Степанов, Ғ. Бердин, Ҡ. Латипов, Ш. Сөләйманов, А. Яковлев, А. Горин һәм Ғ. Шәйхетдинов иптәштәр.

Е. Пряжевский фотоһы.

Ҡ. Ғәбитов

Санитарка

Дауыл ҡоторғанда ҡырҙарҙа,
Шашынғанда туптар күкрәүе,
Снарядтәр, тәрән-тәрән итеп,
Уйған саҡта ерҙең күкрәген,
Сумка тағып килде ул фронтҡа:
— Санитарка, — тине күрешеп,
— Маҡтаулыһы, ләкин бик ауыры,
Тейгән икән, — тилек, — өләштән.
Ҡаҡса тәнле, уҙе урта буйлы,
Тәрән уйсан, ҡара күҙҙәре
Асыулы ине, ләкин бик йыраҡҡа
Төбәләләр өмет эҙләнеп.
Ул бер саҡта өҫтән һалмай ине
Тотоп һеңгән һоро шинелде.
Әйтерһең дә, шунда тупланғандар
Йылылығы Тыуған илемдең...
Бер һуғышта ҡапыл йығылдым
мин
Ул бәйләне килеп яраны.
Мәрхәмәтен һәм шәфҡәтен
һиҙҙем,
Гүйә, әсәм күҙемә ҡараны.
Йыуатты ул:
— Борсолма һин, иптәш,
Доктор табып алыр пуляңды.
Беҙ еңербеҙ, — тине, — дошманды
һәм
Дошман сәсен йөрәгән үлемде!
Оҙаҡламай, ул да яралангас,
Икенсе бер көслө дауылда,
Тағы ҡайтып, еңеү әҙерләшкән
«Ленин» колхозында — ауылда.
Дуҫтар шатлығына, һәм дошманға
Мәңге һүрелмәҫлек үс менән
Һәр йыл һайын иген яланында
Һоҡландырғыс уңыш үҫтергән.
Кем белә бит, бәлки, дүртенсе
май,
Рейхстагты алыу иртәһе,
Штурмға, ашып киткәнмендер
Шул ҡыҙ етештергән икмәкте?!
Хәҙер ҙә ул эшләй колхозда,
Баҫыуҙа мул иген үҫтерә,
Ауырлыҡтар булһа, баш эймәй,
Тик ярһын иҫкә төшерә.

Һуғышта һәм эштә

Өҫтәнә ыҫпай итеп тегелгән офицерҙар шинеле һәм башына ҡара ситле фуражка кейгән кеше ышаныслы рәүештә атлап бара. Уның шинелендә погондар, фуражкаһында ғына йондоҙ юҡ. Ул тәрән уйға сумып бара булырға кәрәк, артынан ҡысҡырыуҙарға туҡтаманы. Тауыш ныҡыраҡ итеп ҡабатланды:

— Николай Васильевич! Николай Васильевич, тим!

Уны өҫтәнә ҡыҫҡа һырма, аяҡтарына ҙур быйма кейгән малай ҡыуып етте. Малайҙың тыны бөткән, ҡып-ҡыҙыл булып ҡыҙарғайны. Ул һүҙен бала-бала әйтте:

— Николай Васильевич! Иптәш Прокудин! Атаһым ҡайтты. Мин һеҙгә китеп бара инем әле...

Өҫтәнә офицер шинеле кейгән кеше туҡталды, тыны бөткән малайға ҡараны ла ул йылмайып ҡуйҙы.

— Ысынын һөйләйһеңме? Быны һәйбәт булған! — тине ул.

Улар кире боролдолар.

Үҙе тыуып үҫкән Өфө районы Русский Юрмаш ауылына демобилизация буйынса ҡыҫҡа генә ҡайтҡан Никифоров Прокудиндың иҫке дуҫы ине. Улар бик оҙаҡ ҡосаҡлашып күрештеләр. Улар һуң төнгә тиклем һөйләшеп ултырҙылар. Фронтта булған хәлдәрҙе һәм иптәштәрен хәтерләнеләр. Үҙҙәре лә һиҙмәҫтән, улар колхоздың һуғышҡа тиклем булған хәленә күстеләр. Колхоз эше Никифоровты ла ныҡ борсоғаны күренеп тора ине. Ул белгән, өйөнә ҡайтыуының икенсе көнөндә уҡ, һөтсөлөк фермаһында ла, конюшняла ла, ат-тыуар ораларын тапҡан да, эшкә булып өлгөргән. Колхоздың хәле һуғышҡа тиклем булғанға ҡарағанда ҡуйы бомшарғайны. Кеше күп, ат-тыуар ҡамеуе, сәсеү майҙаны ҡыҫҡарынылған ине, өҫтәүенә бер йомшаҡ председатель тура килгән «Завет Ильича» колхозының эшен таш ла ҡыйылғаштырыу. Хәҙер быны яҙ яҡынлашып килә. Һис кисекмәҫтән эшкә тотонорға кәрәк ине.

— Мин һинең күптән түгел генә председатель булып торорыуыңды белом, — тине Никифоров. — Шулай ҙа һине иҫәнгерәк булған кеше хатта һинең берәр самаң барҙыр бит?

— Сама ғына түгел, конкрет план бар. Тик быны кешеләрҙе уҙ урындарына ҡуйып бөтергә бар. Быны Разбежкин ҡайтты. Ул унда танкылар ҡырыусы булған. Бик эшлекле егет. Бригадир итеп ҡуйҙыҡ. Һинең хатта ла миңә шундайыраҡ фекер тыуып тора. Нисек ҡарайһың, капитан?

Николай Васильевич һорауны ҡараш менән Никифоровҡа ҡараны. Ләкин ул, мәһәлә колхоз эшенә ҡағылғанда, үҙенең иҫке дуҫының ҡаршы килмәҫен алдан уҡ белә ине.

Никифоров оҙаҡ уйламаны, ризалашты.

Прокудин тиҙлә өйөнә ҡайтҡанда «алып сығырға кәрәк икән, алып сығырбыҙ. Алдынғылар сафына алып сығырбыҙ колхозды» тип уйланы.

«Алып сығырға кәрәк икән, алып сығырбыҙ...». Был һүҙҙәр уның хәтерендә тәрәттәүә ғыш ныҡырған төҫлө булды. Ул хатта артына әйләнеп ҡараны.

... Командирҙы гвардия өлкән лейтенанты Прокудин Николай Васильевичтың 120 миллиметрлы миномёттар батареяһына ҡыҫтырғансы үҙ позицияларын алмаштырырға, бер нисә километр алға китергә, миномёттарҙы яңы урынға урынлаштырырға һәм ут асырға әҙер булырға приказ бирелде. Прокудин хеҙмәт иткән полк ул саҡта Белоруссияның көньяғындағы һаҙлыҡлы районында һөжүм алып бара ине. Тар ғына урман юлы артиллерия һәм обоз үтеүҙән соҡолоп бөткәйне. Ошонда өҫтәүенә көндөҙ көндә ямғыр яуып үтте. Урман юлдары ысын баҙлыҡҡа әйләнде. Ауыр миномёттарҙы алып сығыу түгел, был һаҙлыҡтан үҙеңә йәйәүләп сығыуы ла ҡыйын ине. Шуға ҡарамаҫтан, алға барырға, командованиеның. Батальондың приказын үтәргә кәрәк ине.

— Беренсе миномёт батты, расчет сығара алмай, — тип килеп әйттеләр уға. Ул беренсе взвод командиры йәш лейтенанттың рапортын тыңланы ла, үҙ-үҙенә әйткән кеүек итеп,

— Алып сығырға кәрәк икән, алып сығырбыҙ, — тине.

Һәм барғанда, ысыҡлап та икенсе алып сығырға һуң тип, уйлай-уйлай беренсе расчет янына китте. Ләкин миномёт артынан һаҙҙа булашыуҙан һалдаттар янына барып еткәндә инде ул ниндәйҙер кәрәклекте уйлап бөткәйне.

— Миномётты тиҙ генә һүтергә һәм һүтелгән килеш позицияға илтергә, унда ҡорорға! — тине ул әҙәп, әҙәп.

Хатта офицерҙарға ла миномёт өлөштәрен күтәреп барырға тура килде, ләкин батарея үҙ ваҡытында күрһәтелгән урынға урынлаштырылды.

— Алып сығырға кәрәк икән, алып сығырбыҙ, — тине ул. Был ныҡмы ине? Дүрт йыл элек Николай Васильевичтың боевой тормошонда бындай хәлдәр күп булды. Үҙенең батареяһы менән ул төньяҡ фронтта ла, үҙәк фронтта булғанда ла, Беренсе Белоруссия һәм Беренсе Украина фронттарында булғанда ла — бөтә урында ла ул «алып сыҡты». Ошо ваҡыт эсендә ул рядовой һалдаттан старший лейтенантҡа тиклем үҫте. Биш боевой орден һәм өс медаль менән наградланды.

«Алып сығырға кәрәк икән, алып сығырбыҙ» тине ул Совет Армияһынан демобилизация буйынса ауылына ҡайтып, колхоз председателе булғас. Ләкин был да бер юлы ғына «алып сығыу» булмаясаҡ ине...

Коммунист Прокудиндың етәксе эштә тәжрибәһе бар ине, һуғышҡа тиклем ул ауыл Советы председателе булып эшләгәйне. Совет Армияһында уның был тәжрибәһе артты, байыны. Ул һәр эште кешеләрҙән башларға кәрәклекте бик яҡшы белә ине. Һәм ул шулай башлап китте лә. Тәүге партия ойошмаһының ярҙамы менән ул коммунистарҙы һәм фронтовиктарҙы эштең ауыр участкаларына ҡуйҙы. Бригадир итеп фронтовиктар Разбежкин, Ерикалин һәм Никифоров иптәштәрҙе билдәләгәйне.

— Үҙем дә йоҡламаным, башҡаларға ла тыныслыҡ бирмәнем, — ти иптәш Прокудин.

Колхозға государство ярҙам итте, алдынғы колхоздар булыштылар. Һәм «Завет Ильича» колхозының эштәре алға китте. 1947 йылда иген тапшырыу планын колхоз ваҡытынан элек арттырып үтәне. Артель членларына хеҙмәт көненә килограмм ярымлап иген, байтаҡ аҡса бирелде. Бер һыйырҙан 1500 литр һөт һауып алдылар, э һуғышҡа тиклем 967 литр ғына алалар ине.

Колхоз районның күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулында тота.

1948 йылдың яҙын «Завет Ильича» яҡшы әҙерлек менән ҡаршы алды. Сәсеү орлоғо етерлек итеп әҙерләп ҡуйылғайны. Колхозда атлыҡтар яҡшы ҡаралған. 5 юғары уңыш алыу звеноһы ойошторолған. Быйыл 2500 йөк тирес, 1100 йөк серегән тирес сығарылған. Быйыл колхоз һуғышҡа тиклем булған сәсеү майҙанын сәсәсәк.

Эйе, Николай Васильевич Прокудин үҙенең колхозын районда ғына түгел, бөтә республикала алға алып сығыу өсөн, тере ваҡытта батареяһын алғы позицияға алып сыҡҡандағы кеүек, көрәшәсәк.

Әкрәм Вәли.

Беҙҙең полкта һалдаттар хеҙмәт иттеләр...

(Фронт блокнотынан)

1. ГЕРОЙҘЫҢ АҒАҺЫ

22 июлдә, 1944 йылда Армия Друть артына сыҡты. Белоруссияның кескәй йылғаһы бер ваҡытта үҙендә шул тиклем понтондар тотмағайны. Артиллерияның күкрәүенән йылға ярҙары емерелделәр. Һалдаттар ул ваҡытта үҙҙәрен Минск һәм Барановичиға табан ынтылған карталағы стрелка буйынса барғанлыҡтарын белмәйҙәр, үҙ алдарында дошманды ғына күрәләр ине.

Һәр сәғәт ала килтерҙе. Сәғәт етелә немец «көнсығыш валының» ике линияһы емерелде. Сәғәт һигеҙҙә өс дюжина тигр көл булды. Сәғәт туғыҙҙа авангард Бобруйск шоссеһына сыҡты. Сәғәт унда...

Сәғәт унда өсөнсө батальон «Репная» ҡалҡыулығының һаҙына етте. Һөжүм итеүселәргә бер туҡтауһыҙ немец автоматчиктары аттылар. Фланг аҙыраҡ артта ҡалды. Стрелоктар:

— Станкачтар! Станкачтар! — тип ҡысҡырҙылар. Ике «Максим» бер юлы атты. Ләкин быны файҙаһы аҙ ине. Шунан һуң, йыуан кәүҙәле, ялтырап торған зәңгәр күҙле пулеметчик, һипкелле, йәш лейтенант Твериткиов янына шыуышып килде.

— Ҡырыйҙан атырға рөхсәт итегеҙ! — тине ул, — ҡыуаҡлыҡтан!

— Рөхсәт итәм, — тип риза булды командир.

Цептан икәү айырылып китте. Һыҙғырып осҡан пулялар аҫтында, пулеметте өҫтөрәгән килеш, улар шыуыштылар. Күп тә үтмәй бер яҡ ҡырыйҙан, ҡыуаҡлыҡтан немецтарҙың окоптары буйынса пулеметтар һиптерә башланылар. Тау аҫты һаҙлығынан «Ура» тауыштары яңғыраны, һалдаттар ҡалҡыулыҡҡа йүгерҙеләр. «Репная» алынды.

Шунда уҡ пулеметчиктар ҙә килеп еттеләр. Йыуан кәүҙәлеһе, өлкәнерәге ике урындан бинт менән уратылған һәм носилка алып килгән санитар менән бәхәсләшә ине.

— Һуғыш яланынан китергә выждан етмәй, — тип ҡыҙып һөйләне сержант, пулеметчик. — Аңлайһыңмы, выждан!

— Ят, хәлең бөтәр — ят! Быны шулай, юҡ үҙем ятҡырайым әле...

Улар оҙаҡ ваҡыттар бер береһенең һүҙен тыңламанылар. Санитар икенсе яҡҡа ҡулын алып ҡуйырға ғына теләгәйне, ҡапыл ҡалҡыулыҡта дошман снарядтары ярыла башланы.

— Ҡусты алдында, герой алдында намыҫ ҡушмай, — тип әсетән әйтте пулеметчик һәм носилка эргәһенән аҫҡа тәгәрәп төшөп китте. — Ҡустым өсөн мин үс ала алманым әле...

Артиллерияның атыуҙы туҡтатҡандан һуң немецтар флангынан контратакаға киттеләр. Был уларҙың юғалған позицияны кире ҡайтарыу өсөн һуңғы ынтылыштары ине. Автомат, мылтыҡ атыштарына ике «Максим» тауышы ла ҡушылды. Уларҙың береһе, ҡалҡыулыҡта туҡылдағаны бик ныҡ ята һәм уның янында, күптән түгел санитар менән бәхәсләшкән пулеметчикте танырға мөмкин ине. Гитлерселәр ут нөктәләренә орудиеләрҙән ата башланылар, ләкин пулемет тынманы. Ҡалҡыулыҡҡа совет танкылары килеп еттеләр һәм дошман кире сигенергә мәжбүр булды. Алға ынтылған һалдаттарҙың күбеһе пулеметчик янына барып рәхмәт әйтергә ашыҡтылар. Ләкин уларға тиклем уның янына санитар килеп тә еткәйне.

— Быны инде, дуҫҡай, һиңә өсөнсө тапҡыр инде әләккән, — тине ул үҙенең ярҙамсыһы менән пулеметчикте носилкаға һала-һала. — Әйттем бит мин һиңә, э үҙең намыҫ, намыҫ тиһең...

— Һин минең выжданымды борсома — тип яраланыусы ҡаршы һүҙ әйтте. — Алып кит мине. Мин Саша өсөн аҙыраҡ ҡына булһа ла эш эшләй алдым. Минең выжданым саф. Аһа, ул ҡорттар ярты йөҙгә яҡын тәгәрәгәндәр...

Медицина пунктында, яраланыусыларға карточкалар тултырған сағында, батальон санитары ҡапыл түбәндәгеләрҙе ишетте:

— Василий Матвеевич Матросов, гвардия рядовойы Александр Матросовтың ағайы мин.

Һуңынан санитар күптәргә уның тураһында һөйләне. Василий Матросов Мәскәүгә, өсөнсө наградаһын алырға китҡәс хат яҙҙы: «Тормошта ҡусты булған кешеләр ағайҙарынан өйрәнәләр, э мин үҙ ҡустымдан өйрәнәм. Сашанан бөйөклөккә, ҡыйыулыҡҡа, батырлыҡҡа, Ватанды һөйөргә өйрәнергә мөмкин».

Санитарҙың исеме, фамилияһы Михаил Горшков, ул да Советтар Союзы геройы. Мәскәү эргәһендәге колхозсы Роман Ильич Горшковтың ағаһы ине.

2. «ҺӨЖҮМ ИТЕҮСЕ ИНТЕРНАЦИОНАЛ»

Һуғышта тыуған дуҫлыҡтан да, яҡшы дуҫлыҡ бармы икән?

Улар етәү — ротаның боевой отделение ине. Был отделениелә төрлө милләт халҡы бар. Батырлыҡ күрһәткәнлектәре өсөн был отделениене «һөжүм итеүсе интернационал» тип атанылар.

«Һөжүм итеүсе интернационал» беренсе булып ауылға инде. Яҡындағы өйҙән пулемет ата башланы. Рус ефрейторы Полтава егете Никита Приходько ҡулынан тотоп алып, уны таш стена артына алып китте. Яйлы урын табып, пулемет атҡан урынға граната ташланылар. Пулемет шым булды. Ләкин күрше йорттарҙан урамдарға немецтар борсаҡ шикелле һибелделәр. Клюев ҡулының ашаһынан пуля осоп сыҡты. Егермеләп немец уға ташланды, ләкин Никита күкрәге менән Клюевте һаҡлап алып ҡалды.

Оҫта һуғыу менән Никита бер немецте алғынан йыҡты, икенсеһен штыкҡа күтәрҙе. Өсөнсө дошманды башҡорт егете Ибраһим Ғатауллин, дүртенсеһен — Вашагашвили бәреп йыҡты.

— Үҙебеҙҙекеләргә сигнал бирегеҙ! — тине Клюев отделениелә иң кескәй кеше белорусс Иван Кривенкоға.

Ракетаның уттары күктә һүнергә өлгөрмәнеләр, тыуған ротаның һалдаттары баҡсала күренделәр һәм «һөжүм иткән интернационалдыҡ» ете ҡыйыу кешеһен пленға алырға ынтылған немецтарҙың арттарына төштөләр. Фашистар тармар ителделәр. Ауылда бер немец тә ҡалманы. Дуҫтар бер-береһенең ҡулдарын ҡыҫыштылар, шул ваҡытта таджик Рәхим Симбаев, трофей пулеметында ҡыҙына-ҡыҙына таныш булған йырҙы йырланы:

Биш бармаҡтан төйкәнһә
йоҙороҡ,
Һис булмай уға ҡаршы тороп.
Бармаҡтарҙы айырып тотһаң
әгәр
Йәш бала ла уны өҙөр мағәр.

Был һалдат дуҫлығы тураһындағы йыр ине.

А. Сафонов.

Нәжип Иҙелбай

Утта тыуған дуҫлыҡ

Дүрт йыл буйы бергә булдыҡ,
дуҫлыҡ ҡалды ғүмергә,
Һалдат ашын беҙ ашаныҡ
бер котелоктан, бергә.
Әгәр һуғыш ҡырҙарында
итып ҡалһа берәбеҙ,
Икенсебеҙ ҡотҡарырға
утҡа, һыуға керәбеҙ.
Яралыны иңебеҙгә
һалып сыҡтыҡ шыуышып,
Үлем әҙерлән килһә лә
артыбыҙҙан ҡыуышып;
Ҡулдаҡ еңебеҙҙе йыртып,
бәйләнек ярабыҙҙы,
Ҡайнар йөрәк ҡаны менән
ныҡыттыҡ ярабыҙҙы.
Һуғыш юлын бергә үттек,
нигә күтәреп бер йөк,
Ҡанлабыҙҙы түкһәк — түктек,
йәш алмашмай бөртөк!
Утта тыуған ошо дуҫлыҡ
килтерҙе ҙур еңеүгә,
Яу бөтһә лә бергә булдыҡ,
дуҫлыҡ ҡалды ғүмергә.
Нурлы сәсә, алмулаҡып
атҡан һымаҡ яҙғы таң,
Емерелгәндән тәҙергәлтем,
балҡыйһың, әйҙә, Ватан!
Хеҙмәттә лә, көрәштә лә
дуҫлыҡ кирһен ғүмергә,
Тулып бейеккә ен етергә
бирер үҙ Тыуған илгә!

Халыҡ-ара күҙәтеү

Генеральный Ассамблеяла Палестина тураһындағы мәсьәлә

АҠШ-тың ныҡышмалы рәүештә талап итеүе буйынса саҡырылған Генеральный Ассамблеяның Палестина мәсьәләһе буйынса махсус сессияһы Палестинала ғәрәптәр менән еврейҙәр араһында ҡораллы көрәш барған көндәрҙә үтә. Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Трансиордания еврей халҡына һуғыш иғлан иткән, һәм король Абдулла командованиеһендә ғәрәп ғәскәрҙәре Палестинаға ингәндәр. Ғәрәп илдәре — Трансиордания, Ираҡ, Сирия, Ливан һәм Египет лидерҙәренең Амманда (Трансиордания) булып үткән кәңәшмәһе ғәрәп армияларының Палестинаны оккупациялау пландарын эшләне. Ғәрәп илдәре лигаһының етәкселәре үҙҙәренең һуғыш хәрәкәттәрен активлаштырыу өсөн Палестина өҫтөнән Англия мандаты срогының тамамланыуын (15 май) һәм Англия ғәскәрҙәренең Палестинанан сығарылыуын ғына көткәнлектәре тураһында асыҡтан-асыҡ белдерәләр. Англия «тәртип урынлаштырыу маҡсатында» Палестинаға ҙур ғына яңы көстәр ебәрҙе.

Ваҡиғаларҙың ошо рәүешсә үҫеүе Палестинаны ике бойондороҡһоҙ государствоға—ғәрәп һәм еврей государствоһына бүлеү тураһында Генеральный Ассамблеяның 1947 йыл 29 ноябрь ҡарарына ҡаршы булыусыларға файҙалы булып тора. Бынан тыш бөтә донъя матбуғатында иғлан ителгән фактылар Палестина кризисен тәрәнәйтеүҙә Англияның актив роль уйнағанлығы тураһында һөйләйҙәр. Реакцион ғәрәп лидерҙәре, айырым алғанда Трансиордания короле Абдулла, Англияның марионеткалары булыуҙары менән билдәлеләр. Ғәрәп легионы тип атала торған ғәскәр Англия аҡсаларына аҫырап тотола, Англия ҡоралдары менән ҡоралланған һәм Англия генералы Глабб-Паша командова- [illegible]

бәттә, әлбиттә, Америка һәм Англия капиталына буйһоноро тейеш буласаҡ. Шулай итеп, Палестинаның хәлендәге берҙән-бер үҙгәреш Англия мандатын Англия-Америка хакимлеге менән алыштырыуҙан тора.

«Опека» планының авторҙар иҫәп тотканса яҡланмаясағы билдәле булғас, Англия вәкиле Палестина мәсьәләһен хәл итеүгә ҡарата үҙенең проектын индерҙе. Англияның «нейтраль власть» планы, үҙенең конкрет булмауына ҡарамаҫтан, Палестинаны бүлеү тураһындағы ҡарарға асыҡтан-асыҡ ҡаршы йүнәлтелгән.

Палестина мәсьәләһен ике бойондороҡһоҙ государство — еврей һәм ғәрәп государстволары төҙөү юлы менән берҙән-бер ғәҙел хәл итеүгә ҡаршы килеүсе Америка һәм Англия пландары, СССР-ҙың Ассамблеялағы вәкилдәре күрһәткәнсә, һис тә ҡабул ителерлек план түгелдәр.

Корея халҡы үҙ иленең бөтөнлөгөн һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлай

Американың Көньяҡ Кореялағы командующийы тарафынан 10 майҙа билдәләнгән «закондар сығарыу органына» сепаратный «һайлауҙар» Кореяны бүлгеләүҙе һәм уның көньяҡ өлөшөн Америка колонияһына әйләндереүҙе тамам хәл итеүҙе аңлаталар.

10 майҙа буласаҡ «һайлауҙарҙың» ниндәй һайлауҙар булыуы тураһында Юнайтед пресс агентлығының Сеулдағы хәбәрсеһенең түбәндәге хәбәренә ҡарап хөкөм итергә мөмкин. Ул, «Америка властарының вәкилдәре кореялыларҙың Көньяҡ Корея 10 майҙа буласаҡ һайлауҙарҙа Чадзю (Сайсю) утрауында бюллетендәр биреү һәм һайлау урындарын урынлаштырыу «Америка ғәскәрҙәренә тапшырылһын» тигән һорауҙарын ҡәнәғәтләндерергә риза булдылар», тип яҙа.

[illegible]

ҙы — еврейҙәр һәм ғәрәптәр — колониаль ҡулдарға әүерелләләр. Экономик йәһәттән Палестина, проект авторҙарының фекеренсә, сит ил капиталына, беренсе нәү- [illegible]

[illegible] на үҙенең эске эштәрен хәл итеү хоҡуҡын биреү тураһында Советтәр Союзының тәкдимен бер тауыштан яҡлап сыҡтылар.

А. Шатилов.

Өфөлә радио көнө

7 майҙа Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәре Радио көнөн билдәләнеләр. Кис менән БАССР Министрҙәр Советы залында ҡала хеҙмәтсәндәренең тантаналы йыйылышы булды. Йыйылышта БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге Башҡортостан радио Комитеты председателе иптәш Ғәйзиллов Радио көнө тураһында доклад яһаны.

Докладтан һуң йыйылыштағылар Башҡорт государство опера һәм балет театры солистәре, Башгосфилармония артистәре, Баштрадиокомитеттың иптәш Петухов етәкселегендәге домралар оркестре һәм башҡа искусство көстәре ҡатнашлығында ҙур концерт тыңланылар.

Башҡортостан совет яҙыусылары Дәүләкән районында

Ошо көндәрҙә Башҡортостан совет яҙыусылары бригадаһы Дәүләкән ҡалаһында булды. Бригада орденле шағир Рәшит Ниғмәти, Сәғит Агиш, М. Тажи һәм Павел Куликов иптәштәрҙән тора.

Яҙыусылар ҡаланың бер нисә мәктәбендә, предприятие һәм учреждениеләрендә булып, эшселәрҙе, хеҙмәткәрҙәрҙе һәм уҡыусыларҙы башҡорт совет әҙәбиәте һәм үҙҙәренең яңы әҫәрҙәре менән таныштырҙылар. Уларҙың Дәүләкән МТС-ы коллективы, педагогия училищеһы һәм башҡорт ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары менән осрашыуҙары айырыуса ҙур күтәренкелек менән үтте. МТС эшселәре һәм уҡыусылар яҙыусыларға яңы әҫәрҙәр ижад итеүҙә артабан уңыштар теләнеләр.

Радиоузел әҙәби тапшырыу ойошторҙо. Унда яҙыусылар үҙҙәренең иң яҡшы әҫәрҙәре менән сығыш яһанылар.

Р. Суфиян.

Эшселәрҙең йәйге ялы

Агрегат заводының профсоюз ойошмаһы эшселәрҙең һәм балаларҙың йәйге ялын ойоштороу буйынса конкрет саралар билдәләне. Быйыл эшселәрҙән, инженер-техник работниктарҙан 213 кеше Өфө һәм Берә ял йорттарында ял итәсәк, 37 кеше Башҡортостан, Кавказ һәм Ҡырым курорттарына ебәреләсәк.

Эшселәрҙең балалары өсөн Аҡдон станцияһы янындағы Таптыково ауылында пионер лагере асыла. Бында һәр бер сменала 100-әр бала ял итәсәк. Ватан һуғышы инвалидтәре һәм һуғышта һәләк булыусыларҙың балаларына 30 путевка түләүһеҙ биреләсәк.

Пионер лагерында эшләү өсөн кәрәкле штат һәм инвентарҙар әҙерләнде.

Стахановсылар мәктәбе

Өфөнөң ширпотреб фабрикаһында 75 эшсе стахановсылар мәктәбен тамамланы. Мәктәптең программаһы буйынса улар эш урыны, хеҙмәтте ойоштороу, инструменттәрҙе әҙерләү, хеҙмәттең яңы методтары тураһында доклад, лекциялар тыңланылар.

Мәктәп эшселәрҙең квалификацияларын күтәреүгә ҙур ярҙам итте. Бында уҡып сыҡҡан иптәштәр көндәлек норманы икеләтә арттырып үтәйҙәр. Ә айырым эшселәрҙең, мәҫәлән, Воронин, Баширова иптәштәрҙең көндәлек хеҙмәт етештереүсәнлеге 300 процент тәшкил итә.

Һүрәттә: СССР гроссмейстеры В. Смыслов һәм АҠШ чемпионы гроссмейстер С. Решевский уйнайҙар. Уртала матч-турнирҙың баш судьяһы М. Видмар.

Л. Великжанин фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

ДОНЪЯ ШАХМАТ ЧЕМПИОНАТЫ

7 майҙа Смыслов менән Решевскийҙың киҫектерелгән партияһы уйнап бөтөү булды. Решевскийҙың бер ладьяһы, өс пешкаһы, Смысловтың бер ладьяһы, ике пешкаһы ҡалғайны. Решевскийҙың еңеүгә иҫәп тотоуы шуның менән ҡатмарланды, сөнки бөтә пешкалар ҙа бер флангыла тупланғайны. Решевский еңергә бик оҙаҡ тырышты, ләкин булдыра алманы. Партия 73 йөрөштән һуң яңынан киҫектерелде һәм Решевскийҙың һаман да материаль өҫтөнлөге бар. Хәҙер партияның отошһоҙ бөтөүе шик тыуҙырмай.

8 майҙа был партия икенсе тапҡыр ҡайтанан уйнала. 9 майҙа Союздар йортоноң Колонналар залында матч-турнирҙың һуңғы ҡуғының икенсе туры була. Был турҙа: Ботвинник—Эйве һәм Керес—Смыслов осрашасаҡтар. Решевский уйындан буш.

(ТАСС).

Фельетон урынында

„Минән ҙурыраҡ түрә таба алмаҫһың...“

Салт аяҙ көн. Ғабдрахманов шат һәм эшенән риза. Ул Төмәнәк лесничествоһының объездчигы. Көтмәгәндә: «Ағас ҡырҡыуҙың ҡағиҙәләрен боҙған өсөн, урман һаҡлау эшен тарҡатҡан өсөн һәм эскеселек өсөн..., эшенән алырға...», тигән приказ килеп төшә.

Ул, үҙенә ышанмайынса, белгән сәмәтен ҡараны: өнмө, төшмө был? Биш йыл буйы намыҫ менән эшләне ул. Бер генә иҫкәртмә, шелтә алғаны юҡ, киреһенсә, яҡшы хеҙмәте өсөн бер тапҡыр бүләк бирелгән, медаль менән наградланған.

Ошо көндән алып ул хаҡлыҡ эҙләргә керешә, хаттар, ғаризалар яҙа.

— Һин минән ҙурыраҡ начальникте таба алмаҫһың! Мин теләһәм, эштән сығарам, теләһәм... алам. — тине уға лесхоз директоры Софьин.

Ғабдрахманов үҙе член булып торған урман һәм һал эшселәре профсоюзының район комитетына жалоба бирә. Райком, 27 көндән һуң, «ашығыс» ултырыш яһай. Райком председателе Колтунова «эскеселек, урлашыу» дәрәҫләнмәне. Эшенән алмаҫҡа, тигән ҡарар сығарғас, тынысланa...

Туймазыла Ғабдрахманов хаҡлыҡ таба алманы. Ул бер сумка материалдар менән (акттар, квитанциялар, приказдар) Өфөгә, үҙенең депутаты янына китә. Депутат тыңлай һәм урман, һал эшселәре профсоюз ойошмаларының өлкә комитетына хат яҙа. Өлкә Комитет был волокитаға сик ҡуйырға теләй. Ашығыс ултырыш була. Совет һәм профсоюз закондары нигеҙендә профсоюз ойошмаһы Чеботарев иптәшкә Ғабдрахмановты үҙ эшенә ҡайтарырға, ә эшһеҙ үтелгән көндәре өсөн компенсация түләргә тип тәкдим итәләр... Профсоюз өлкә комитетының ҡарары менән Чеботарев иҫәпләшмәй, күрәһең. Тәкдимде үтәмәй. Ә Софьин трагедия менән келеп көнә ҡуя.

— Йә, минән ҙурыраҡ түрә таптыңмы? Мәскәүгә етһәң дә барыбер эшкә алмам. Унда ла минең дуҫтар бар...

Күп тә үтмәй Башлесуправлениенан А. Порцман килә. Ул тикшерә, һәм Ғабдрахмановҡа «Башҡа урынға китһәң барыбер тынысһа алмаҫһың» тип «дуҫтарса» кәңәш бирә. Башҡа «аҡыллы» кәңәштең авторы кадрҙар бүлегенең начальнигы булып эшләй (!). Күп тә үтмәй, эштән сығарылыуына алты ай ҙа ун биш көн, ә өлкә комитет ҡарарынан һуң теүәл бер ай үҙғас, Чеботарев «экстренный» бойороҡ бирә. Ғабдрахмановты эш урынына урман ҡырҡыусыһы итеп билдәләргә (!).

— Йә, үҙеңде яңы хеҙмәт урының менән ҡотларғамы?, — тип әйтә Софьин.

Ғәйепһеҙгә эшенән төшерелгән алты ай ярым «сәйәхәт» ҡылғандан һуң, Ғабдрахмановты урман ҡарауылсыһы итеп билдәләргә ҡушалар.

Ғабдрахманов тағы хаттар, ғаризалар яҙа, һәм бөтә тарихы яңынан башлана. Көн һайын Туймазынан пассажир поезы үтә, уның почта вагонында Ғабдрахмановтың хаттары ла бара. Улар дәрәҫләп эҙләп сәйәхәт итәләр. Ҡасанға тиклем?

И. Абдуллин.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Кореянан сит ил ғәскәрҙәрен сығарыу тураһында

ПХЕНЬЯН, 7 май. (ТАСС). Төньяҡ Кореяла совет ғәскәрҙәре командующийы генерал-лейтенант Коротков бөгөн Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның политик партиялары һәм общественный ойошмаларының берләшкән кәңәшмәһе председателе Ким Ду Бонға ошо күрһәтелгән кәңәшмәнең Совет Хөкүмәтенә яһаған мөрәжәғәтенә Совет Хөкүмәтенең түбәндәге яуабын тапшырҙы:

«Мин Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның политик партиялары һәм общественный ойошмаларының берләшкән кәңәшмәһе председателе булыуыгыҙ яғынан һеҙгә Совет Хөкүмәтенең был кәңәшмә мөрәжәғәтенә яҙған түбәндәге яуабын тапшырырға ҡушылды:

«Совет Хөкүмәте Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның политик партиялары һәм общественный ойошмаларының берләшкән кәңәшмәһенең Кореянан бер үк ваҡытта үҙ ғәскәрҙәрен сығарыуҙы һәм Корея халҡына ирекле рәүештә, сит ил ҡыҫылыуынан башҡа дәүләт һайлауҙар үткәрергә, дөйөм милли демократик хөкүмәт төҙөргә һәм берҙәм бойондороҡһоҙ демократик государство төҙөргә мөмкинлек биреүҙе һорап СССР һәм АҠШ хөкүмәттәренә яһаған мөрәжәғәтен алды.

Совет Хөкүмәте Корея халҡының үҙ илен берләштерергә һәм бойондороҡһоҙ демократик Корея государствоһын төҙөргә булған ынтылышын яҡшы аңлай һәм быға ыңғай ҡараштa тора. Тап шуға күрә лә Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының икенсе сессияһында Совет делегацияһы Корея мәсьәләһен Корея халҡы вәкилдәренең ҡатнашлығынан башҡа һәм уның милли интерестарын иҫәпкә алмайынса хәл итергә маташыуҙарға ҡаршы сыҡты.

Совет Хөкүмәте Кореянан Америка һәм Совет ғәскәрҙәрен бер үк ваҡытта сығарыу кәрәклеген ныҡышмалы рәүештә талап итте һәм быны Корея халҡының үҙ теләгән ирекле рәүештә белдереүен тәьмин итеү өсөн мәжбүри шарт булып тора, тип иҫәпләне. Билдәле булғанынса, Совет делегацияһы 1947 йылдың сентябрендә үк әле ҡатнаш Совет-Америка комиссияһында ғәскәрҙәрҙе сығарыу срогын 1948 йыл башына билдәләргә тәкдим итеп, шундай үк тәкдим индергәйне. Был тәкдим Совет делегацияһы тарафынан 1947 йылдың октябрендә Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһы сессияһында яңынан ҡабатланғайны. Ләкин Совет Хөкүмәтенең был тәкдиме ҡабул ителмәне.

Совет Хөкүмәте, Кореянан АҠШ ғәскәрҙәре лә бер үк ваҡытта сығарылған шартта, Кореянан үҙ ғәскәрҙәрен сығарыуҙы һис кисекмәҫтән тормошҡа ашырырға әҙер».

ТӨНЬЯҠТА ДОГОВОР БУЙЫНСА ЭШЛӘҮ ӨСӨН АШЫҒЫС РӘҮЕШТӘ ТҮБӘНДӘГЕ СПЕЦИАЛИСТӘР ТАЛАП ИТЕЛӘ:

Инженерҙәр: тау инженерҙәре, электромеханиктәр, обогатителдәр, бораулап шартлатыусылар, экономистәр, химиктәр, бораулаусылар, хеҙмәт буйынса экономистәр, геологтар, технологтар, геодезистәр, механиктәр, картографтар, гидрогеологтар.

Техниктәр: тау техниктәре, маркшейдерҙәр, электромеханиктәр, бораулап шартлатыусылар, геологтар—минералогтар, геодезистәр, геологтар, метеорологтар, тау эше нормировщиктәре, бораулаусылар, физиктәр—химиктәр, химиктәр, топографтар һәм картографтар, автотрактор эше техниктәре, теплотехниктәр, механиктәр (экскаваторҙар һәм дизелдәр буйынса), конструкторҙар—металлургтар, хеҙмәт буйынса экономистәр, радистәр.

Врачтар: терапевтәр, медицина фельдшерҙәре, медицина сестралары һәм акушеркалар.

Сауҙа һәм дөйөм туҡланыу работниктәре: магазиндәр мөдирҙәре, столовой мөдирҙәре, һатыусылар, материаль-хужалыҡ бүлеге мөдирҙәре, товароведтәр.

Башҡа төр специалистәр: бухгалтерҙәр, өлкән бухгалтерҙәр, 7—8 разрядтағы токарҙәр, 7—8 разрядтағы расточниктәр, фрезеровщиктәр, I, II, III класлы шоферҙәр.

Тау мастерҙәре курстарында уҡыу өсөн 10 класс күләмендә белеме булған, 20 йәштән алып 30 йәшкә тиклемге һәм башҡа эштәрҙә эшләү өсөн 21 йәштән алып 35 йәшкә тиклемге ирҙәр талап ителә.

Эш шарттары килешеү буйынса. Эшкә яллаһыу шарттары тураһында белешмәләр алыу өсөн, ял көнөнән тыш, һәр көн һайын иртәнге 10 сәғәттән алып киске 5-кә тиклем, һәм киске 8 сәғәттән алып төнгө 12 сәғәткә тиклем түбәндәге адреска мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 7-се номерле йорт. Телефон номеры 2—74-27.

Эшкә яллау бүлеге.

Башҡорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорт управлениеһы Йомаатау неврологик санаторийына, Красноусольск һәм Янғантау бальнеологик санаторийҙарына 1948 йылға путевкалар һата.

Ағымдағы йылдың сезонында был санаторийҙарҙы төҙөкләндереү һәм йыһазландырыу буйынса күп кенә саралар үткәрелде. Йомаатауҙа май айынан алып ҡымыҙ менән дауалау башланасаҡ.

Путевкалар профсоюздарға, предприятиеларға, учреждениеларға һәм шулай уҡ курортҡа ебәреү комиссияһының заключениеһы булған айырым кешеләргә һатыла.

Путевкаларҙың хаҡы түбәндәгесә: Йомаатау санаторийына—1200 һум, Красноусольск һәм Янғантау санаторийҙарына 900 һум.

Путевкалар алыу тураһындағы ғаризалар менән мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 106-сы номерле йорт, 5-се ҡат, 207-се номерле бүлмә. Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорттар управлениеһы.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00740 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 93
11 май
шишәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы «Башнефтьзаводтар» берекмәһенең Өфө нефть эшкәртеү заводын Ленин ордене менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).

Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы «Башнефть» берекмәһенең нефть сығарыусы «Туймазынефть» тресын Ленин ордене менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).

Нефть промышленносе Министерстволары работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указдары. (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. А. Ардеев. — Агитацион-массовый эш юғары кимәлгә. (2-се бит).

Бөтә тракторҙарҙы ла тулы ҡеүәтендә файҙаланырға! (2-се бит).

В. В. Даниилевский. — Техникала рус кешеләренең беренселеге. (2-се бит).

Башҡортостан урманлы республика исемен юғары тоторға тейеш. (3-сө бит).

Район газеталары биттәренән. (3-сө бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

ССР Союзы Финанс Министерствоһының белдереүе

1948 йылдың 3 майында 20 миллиард һум күләмендә сығарылған СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемы ошо йылдың 7 майы аҙағына 22 миллиард 592 миллион 233 мең һум күләмендә, йәғни 2 миллиард 592 миллион 233 мең һумға арттырып урынлаштырылды.

Заемдың билдәләнгән суммаһы байтаҡ арттырып үтәлеүе айҡанлы, СССР Министрҙар Советының күрһәтмәһе нигеҙендә, СССР Финанс Министерствоһы тарафынан 1948 йылдың 9 майынан алып заемға артабан яҙылыуҙы бөтә ерҙә лә туҡтатырға ҡушылды.

СССР Финанс Министре
А. КОСЫГИН.

БАТЫР ХЕҘМӘТКӘ ДОСТОИН НАГРАДА

Бынан ун дүрт йыл элек, партияның XVII съезында бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин: «Урал тауҙарының көнбайыш һәм көньяҡ итәктәре районында нефть базаһы ойоштороуға серьез тотонорға кәрәк» тигәйне. Совет халҡы юлбашсыбыҙ тарафынан ҡуйылған ҙур һәм мөһим бурысты намыҫ менән үтәне. Тыуған илебеҙҙең көнсығышында ҡеүәтле яңы нефть базаһы — «Икенсе Баку» барлыҡҡа килтерелде. Ә Ленин орденле совет Башҡортостаны «Икенсе Бакуҙың» иң күп нефть биреүсе алдынғы районына әүерелде.

Хәҙер республикабыҙҙа ҙур нефть промыселдәре, бораулау конторалары, алдынғы техника менән ҡоралланған нефть эшкәртеү, нефть машиналары һәм оборудованиеләре төҙөү заводтары, ҙур төҙөлөш трестары, бик күп ярҙамсы предприятиеләр үҫеп сыҡты. Ағиҙел буйында, Нарыш һырттарында тәрән ер аҫтынан сығарылған «ҡара алтын» йөҙҙәрсә километрға һуҙылған ер аҫты магистраленән Өфө нефть эшкәртеү заводына өҙлекһеҙ ағып килә.

Бынан һигеҙ йыл элек ҡала исемен алған Ишембайҙа, дауыллы һуғыш йылдарында девон нефтен асҡас уҡ ҡалаға әүерелгән Октябрьскиҙа шаулы тормош, бай хеҙмәт ҡайнай. Нефть ятышлы райондар киңәйә, вышкалар урманы ҡуйыра, ер аҫтына һөжүм итеүсе, күберәк «ҡара алтын» сығарыусы, бензин һәм башҡа төр нефть продукттарын етештереүсе кешеләр һаны арта бара. Беҙҙең партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ ундай кешеләрҙең хеҙмәтен юғары баһалай. Тыуған илебеҙгә күберәк нефть биреү өсөн ҙур хеҙмәт күрһәткән алдынғы нефтселәрҙең хеҙмәттәре Совет хөкүмәте тарафынан күп тапҡырҙар билдәләнде.

Бөгөн газетабыҙҙа Көньяҡ һәм Көнбайыш райондарының, шулай уҡ Көнсығыш райондарының нефть промышленносе Министерстволары работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, шулай уҡ «Туймазынефть» тресын һәм Өфө нефть эшкәртеү заводын Ленин ордендәре менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указдары иғлан ителә. Нефтселәр генә түгел, бәлки бөтә Башҡортостан кешеләре Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеүселәр араһында ер аҫты ремонты мастере Акмал Ғилфан улы Вахитов, бораулау мастере Иван Дмитриевич Куприянов, «Башнефть» берекмәһе начальнигы Степан Иванович Кувыкин иптәштәрҙең фамилияларын тәрән ғорурлыҡ менән уҡыйҙар. Шулай уҡ республикабыҙ хеҙмәтсәндәре юғары награда — Ленин орденына лайыҡ булған «Туймазынефть» тресының, Өфө нефть эшкәртеү заводының батыр коллективтары менән ғорурлана ала.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре республикабыҙҙа барлыҡҡа килтерелгән ҡеүәтле нефть промышленносе, уның батыр кешеләре йәнле большевиктар партияһына һәм Совет Хөкүмәтенә, бөйөк Сталиндең еңеүсе идеяһына, атайҙарса ҡайғыртыуына, ҙур ярҙамына бурыслы. Һәм бөгөн республика халҡы нефть промышленносе эшсе һәм уның кешеләренең хеҙмәттәрен шулай юғары баһалауы өсөн хөкүмәтебеҙгә, бөйөк Сталинға бөтә йөрәктән рәхмәт әйтә.

Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелгән кешеләрҙең, Ленин ордене менән наградланған коллективтарҙың хеҙмәттәре ҙур. Иптәш Степан Кувыкин һәр төрлө ҡаршылыҡтарҙы емереп һәм сикһеҙ ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, ауыр һуғыш йылдарында бай девон нефтен асыуҙы, нефть сығарыуҙы өҙлекһеҙ арттырыуҙы, яңы майҙандарҙа разведка һәм бораулау эшен киң йәйелдереүҙе ойоштороусы һыналған етәксе. Иптәш Акмал Вахитов үҙенең 25 йыл ғүмерен нефть промышленносына арнаны. Ул Грозныйҙа 12 йыл буйына туплаған бай тәжрибәһе менән 13 йыл инде Ишембай нефтселәрен ҡоралландыра. Икс йөҙҙән артыҡ скважинаны хеҙмәтләндереүсе ер аҫты ремонты буйынса өлкән мастерҙың фиҙакәр хеҙмәте икенсе промыселдең нефть сығарыу планын систематик арттырып үтәүендә ҙур роль уйнай. Тиҙләтелгән метод менән бораулау хәрәкәтен башлап ебәреүсе беренсе класс бораулау мастере иптәш Иван Куприянов бөтә республикаға билдәле. Уның кеүек тәрән ер аҫтына тиҙ һәм батыр һөжүм итеүсе йөҙҙәрсә кешеләр Туймазыла девон нефтен сығарҙылар һәм трестҡа дан — Ленин ордене яулап алдылар. Осҙаҡлы һәм Миңесән иптәштәр етәкселек иткән Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы — боевой, беҙҙең коллектив булыу менән билдәле. Ауыр һуғыш йылдарында был коллективҡа Государство Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы 22 тапҡыр бирелде һәм ул мәңге һаҡлау өсөн заводта ҡалдырылды. Тыныс осорға күсеүҙә лә большевистик темп менән эшләгән был коллективтың артабанда ла Ленин орденле завод исемен юғары тотасағына шикләнмәҫкә мөмкин.

Совет Хөкүмәте нефтселәрҙең хеҙмәтен юғары баһаланы. Башҡортостан нефтселәре был юғары баһаға хеҙмәт менән яуап бирергә тейештәр. Һәм сталинсе заданиеларҙы һәр ваҡыт намыҫ менән үтәгән, киләсәктә лә үтәүгә әҙер тороусы нефтселәрҙең яуабы достоин буласаҡ. СССР Верховный Советы Президиумының Указдары айҡанлы Октябрьск, Ишембай, Черниковск ҡалаларында меңдәрсә кешеләр ҡатнашлығында булып үткән митингылар шул турала һөйләй.

Нефть сығарыуҙы йыл һайын 60 миллион тоннаға еткереү тураһында совет нефтселәре алдына ҡуйылған сталинсе бөйөк программаны үтәүҙә тәүге этабы тиңһеҙ булып килгән яңы биш йыллыҡтың ике йылында Башҡортостан нефтселәре планда булғандан йөҙҙәрсә мең тонна нефть, бензин бирҙеләр. Өлгәшелгән уңыштар, хөкүмәт наградалары аҙ ғына ла тынысланырға урын ҡалдырмай. Республика нефть промышленносе партияның һәм партиябыҙ большевиктары биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү тураһында бөйөк Сталинға биргән вәғәҙәләрен практик эш менән аҡлау өсөн социалистик ярыш байрағын яңы юғарылыҡҡа күтәрергә, бөтә мөмкинлектәрҙе боевой хәрәкәткә килтерергә, булған етешһеҙлектәрҙе тиҙ бөтөрөргә бурыслылар.

Башҡортостан нефтселәре! Тыуған илебеҙҙең нефть байлыҡтарын тағы ла күбәйтеү өсөн көрәштә яңы еңеүҙәргә!

Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы „Башнефть" берекмәһенең нефть сығарыусы „Туймазынефть" тресын Ленин ордене менән наградлау тураһында

СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ УКАЗЫ

Государство өсөн ҙур әһәмиәтле булған яңы нефть ятыштарына разведка буйынса хөкүмәт заданиеларын уңышлы үтәгәне, нефть сығарыуҙы һәм нефть скважиналарын бораулауҙы систематик арттырғаны һәм 1946 һәм 1947 йылдарҙа нефть сығарыу буйынса государство пландарын үтәгәне өсөн Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы «Башнефть» берекмәһенең нефть сығарыусы «Туймазынефть» тресын Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.
СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
8 май, 1948 йыл.

Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы „Башнефтезаводтар" берекмәһенең Өфө нефть эшкәртеү заводын Ленин ордене менән наградлау тураһында

СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ УКАЗЫ

Государство планын уңышлы үтәгәне һәм ил өсөн бик әһәмиәтле булған нефть продукттарын эшләп сығарыуҙы систематик рәүештә байтаҡ үҫтергәне өсөн Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһындағы «Башнефтезаводтар» берекмәһенең Өфө нефть эшкәртеү заводын Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.
СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
8 май, 1948 йыл.

Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһы работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһында

СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ УКАЗЫ

Нефть сығарыуҙы, яңы нефть ятыштарына разведканы һәм нефть скважиналарын бораулауҙы арттырыу эшендә күренекле хеҙмәттәре өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирергә, Ленин ордене һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын миҙалы тапшырырға:

1. Акмал Ғилфан улы Вахитовҡа — «Ишембайнефть» тресының скважиналарын ер аҫты ремонты мастерына.
2. Степан Иванович Кувыкинға — «Башнефть» берекмәһенең начальнигына.
3. Иван Дмитриевич Куприяновҡа — «Туймазынефть» тресының бораулау мастерына.
4. Әхмәт Нурмөхәмәт улы Мостафиновҡа — «Куйбышевнефть» берекмәһенең баш геологына.
5. Григорий Трофимович Подшивайловҡа — «Дальнефть» берекмәһенең бораулау участкаһы начальнигына.
6. Абдулла Сабирьян улы Сабирьяновҡа — «Ставропольнефть» тресының бораулау мастерына.
7. Павел Иванович Стрижовҡа — «Калининнефть» тресының бораулау мастерына.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.
СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
8 май, 1948 йыл.

Көньяҡ һәм Көнбайыш райондары нефть промышленносе Министерствоһы работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреү тураһында

СССР ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ УКАЗЫ

Нефть сығарыуҙы, нефть продукттарын эшкәртеүҙе, яңы нефть ятыштарына разведканы һәм нефть скважиналарын бораулауҙы арттырыу эшендә күренекле хеҙмәттәре өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирергә, Ленин ордене һәм «Ураҡ һәм сүкеш» алтын миҙалы тапшырырға:

1. Гюль Бала улы Алиевҡа — «Сталиннефть» тресының скважиналарҙы капиталь ремонтлау конторалары ҡатмарлы эштәр мастерына.
2. Семен Семенович Апряткинға — «Грузнефть» берекмәһенең начальнигына.
3. Михаил Иванович Бальзамовҡа — «Краснодарнефтеразведка» тресының баш геологына.
4. Рөстәм Гаджи Әли улы Исмаиловҡа — «Азнефтезаводтар» берекмәһенең баш инженерына.
5. Сәмигулла Шәйи улы Миндебаевҡа — «Октябрьнефть» тресының скважиналарын ер аҫты ремонты мастерына.
6. Алексей Ильич Орловҡа — «Бузовнынефть» бораулау мастерына.
7. Даниил Степанович Спиринға — «Лениннефть» тресының 6-сы промыселе мөдиренә.
8. Баба Пир Мамед Устага — «Бузовнынефть» тресының бораулау конторалары директорына.
9. Александр Степанович Хрищановичҡа — «Апшеронефть» тресының бораулау мастерына.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.
СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль.
8 май, 1948 йыл.

Еңеү шатлығы

ОКТЯБРЬСК, 10 май (Телефон аша). 9 май көнө Октябрьск нефтселәре өсөн айырыуса шатлыҡлы, ғорурлыҡ көнө булды. Сенкы был көнө нефтселәр ике еңеү шатлығын байрам иттеләр. Совет Социалистик Союзы фашистик Германияны Еңеү байрамы тантанаһы «Туймазынефть» тресын Ленин ордене менән наградлау тураһындағы һәм тресттың бораулау мастере Иван Дмитриевич Куприяновҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указдары айҡанлы тыуған шатлыҡ менән ҡушылды.

Трест коллективенең һәм бораулау мастеренең хеҙмәтен юғары баһалауы тураһындағы был Указдарҙың радио аша ишетелеүе менән митингы булды. Митингыны ВКП(б) ҡала комитетенең секретаре иптәш Н. Сарычев асты.

— Иптәштәр! — тине ул клубтағы шығырым тулы халыҡҡа мөрәжәғәт итеп,—Һеҙҙе СССР Верховный Советы Президиумы Указдары тыуҙырған ҙур шатлыҡ менән ҡотлайым. Беҙ Көнсығыш райондары нефтселәре араһында намыҫлы хеҙмәттә сыныҡҡан коллективыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Беҙҙең нефтселәр беҙҙең хеҙмәтебеҙгә юғары баһа биргәндәре өсөн, бөтәһенән элек большевиктар партияһына, Совет Хөкүмәтенә һәм атайыбыҙ Сталинға тәрән рәхмәт белдерәбеҙ.

— Был бөйөк наградаға яуап итеп, беҙ ВКП(б) Үҙәк Комитетына, иптәш Сталинға биргән вәғәҙәбеҙҙе ысын намыҫ менән үтәрбеҙ.

Трибунаға «Туймазынефть» тресының управляющие, орденле иптәш Нифантов күтәрелә. Нефтселәр Ленин орденле «Туймазынефть» тресы етәксеһен ҡотлап ҡул сабалар. Ул тәрән эске кисереш һәм ғорурлыҡ менән һөйләй, коллективте артабан хеҙмәт батырлығы күрһәтергә, быйыл пландан тыш йәнә мең тонна нефть бирергә саҡыра.

Митингыла шулай уҡ беренсе промыселдең директоры Ерохин, беренсе бораулау контораһының директоры Поляков, партия ойошмаһы секретаре Сләпин һәм башҡалар сығып һөйләнеләр.

Трибунаға бораулау мастере, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Куприянов күтәрелә. Митингыла ҡатнашыусылар геройҙы ҡыҙыу алҡышлайҙар.

— Мин, — ти ул тәрән тулҡынланыу менән, — хеҙмәтемде юғары баһалағандары өсөн Совет Хөкүмәтенә, большевиктар партияһына, һөйөклө Сталинға күңелемдән тәрән рәхмәт әйтәм. Бөйөк наградаға яуап итеп ер аҫтына тағы ла тиҙерәк үтеү өсөн һөжүм итергә, быйыл һәр станокайҙа 1000 метр тиҙләгендә бораулауға һүҙ бирәм.

Митингы һөҙөмтәһендә бөйөк Сталинға ҡотлау телеграммаһы ҡабул ителде.

И. Болдагоев
Р. Камалов.

Ҡарт нефтсенең рәхмәте

Беҙҙең сотрудникебеҙ «Ишембайнефть» тресының ер аҫты ремонты мастере, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Вахитов менән телефон аша бәйләнеш тотто. Иптәш Вахитов икенсе промыселдәге үҙенең эш участкаһынан түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

— Бәтәһенән элек, — ти ул, — Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреп, минең хеҙмәтемде юғары баһалағаны өсөн Совет Хөкүмәтенә, үҙем уның члены булып торған большевиктар партияһына, бөйөк юлбашсы, һөйөклө Сталинға бөтә йөрәгемдән рәхмәт әйтәһем килә.

— Минең 48 йыл ғүмеремдең егерме биш йылы нефть промышленносына арналды. Бөйөк наградаға яуап итеп, тағы ла арттырылған энергия менән эшләргә, бөйөк Ленин—Сталин партияһының исемен һәр ваҡыт юғары тоторға, үҙем эшләгән икенсе промыселдең Тыуған илебеҙгә күберәк нефть биреүе өсөн хеҙмәтемде аямай һалырға һүҙ бирәм.

...ларе «урам тар» тиау менән Ленин урамына тыртмаҫҡа маташалар. иларҙын береһен йәшелләүгә былдай ҡараш бөтерылыҙ.

...эштәге был серьез етешһес киселмәҫтән бөтөрөлөш.

...абыҙҙы йәшелләндереү быйыл 9400 төп ағас, ...ҡыуаҡлыҡ ултыртыу ...ла. Бынан тыш скверҙа мең төптән артыҡ ...ең төптән күберәк ҡыултыртылырға тейеш.

...ен күләме бәләкәй түбыны үтәү генә түгел, ...арын үтәргә кәрәк. Ә ...әр күп. Башҡаланың ...ия, комсомол ойошмаләшелләндереү эше менән етәкселек итергә, бөтәнесте урам, парк, баҡсаларҙы йәшелләндереү үткәреүгә күтәрергә, ...ность предприятиеләреклениеләрҙең һәм ойошколлективтарын үҙ тро... урамдарын йәшелләндереүгә тейештәр. ...ым яңы ултыртылған ...кәртә ҡуйҙе яҡын кәремләргә кәрәк. Ултырған ағас учетҡа алыныр...

управлениеһы... ға беркетелергә тейе...

Ағас ултыртыу ме... тәя, яҡын көндәрҙә ... ҙағы газондарҙы тә... рергә кәрәк. Ҡор... урамына яңылары у... тейеш. Ленин район... газондарҙы тимер ... уратып алыу практ... ҡуйылырға тейеш ту...

Ҡаланы йәшелләнд... миәте ҙур. Был тура... һында систематик ... тыу эше алып бары... ҙы, газондарҙы тәрб... буйынса райондар, ... борт управлениеләр... йорттарҙа йәшәүсел... социалистик ярыш о... рергә кәрәк. Сөнки ... һиле» уңышлы үткәр... раттай ҡаланы ... эшен артабанда ла ... дауам иттерергә тейе...

Хеҙмәтсәндәр де... ның Өфө ҡала С... комы председат... басары.

...ЛИСТИК ХЕҘМӘТ ГЕРОЙҘАРЫ

Иван Дмитриевич Куприянов — «Туймазынефть» тресының бораулау мастере.

Степан Иванович Кувыкин — «Башнефть» берекмәһенең начальнигы.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Агитацион-массовый эш юғары кимәлгә

Партияның XXI өлкә конференцияһы ҡарарҙарын, колхозсыларҙың социалистик алдынғы кутәреүҙе һәм уларҙы был йылдың дүрт йылда утәү өсөн көрәшкә туплау маҡсатында, бөтә районда партия ойошмалары партия һәм хөкүмәттең ҡарарҙарын, Совет государствоһының эске һәм тышҡы сәйәсәтен һәр ваҡыт аңлатып торорға тейеш. Был бурыстарҙы практик рәүештә тормошҡа ашырыу ВКП(б) райкомы аппаратының, партия һәм совет активының [illegible]. Шуның өсөн беҙ эште партия һәм совет активын политик тәрбиәләүҙән башлап ебәрҙек.

Партактивында политик һәм экономик мәсьәләләр буйынса доклад һәм лекциялар уҡыла. Лекциялар темалары төрлө. Ул тарих, география, политэкономия, [illegible] закон, халыҡ-ара хәл, тәбиғәт фәндәре мәсьәләләре [illegible].

Бындай лекциялар хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште көсәйтеүгә ярҙам итә. [illegible]

Апрель айында колхозсылар араһында районда [illegible] 33 лекция уҡылды. Район Советы башҡарма комитеты председателе Шестаков, прокурор Мансуров, ауыл хужалығы бүлеге мөдире Вшивцев иптәштәр [illegible] лекциялар уҡыны.

Беҙ райкомдың инструкторҙарын, пропагандисттарын һәм бүлек мөдирҙәрен колхоздарҙа беркетеп ҡуйҙыҡ. Улар был колхоздарҙа партия-политик һәм ойоштороу эштәрен юлға һалыуҙа тәүге партия ойошмаларына [illegible] ярҙам күрһәтәләр.

«Ок-кй» колхозы районда иң артта ҡалыусыларҙан иҫәпләнә. Бында партия ойошмаһы ла йомшаҡ эшләй ине. Партия йыйылыштары [illegible]. Коммунистар [illegible]. Шул арҡала улар башҡа колхозсыларҙы эйәртә алмайҙар ине. [illegible] Тәүге партия ойошмаһы секретаре иптәш Захаровҡа эш планы төҙөүҙә, коммунистарҙы производственный эштә [illegible] ярҙам күрһәтте. Агитколлективтың эшен йәнләндерҙе. Колхозсыларҙың үҙҙәренең туған телдәрендә — мордва телендә халыҡ-ара хәл һәм башҡа темаларға доклад, лекциялар уҡыны. [illegible] Хәҙерге көндә был колхоз [illegible].

Етәксе работниктарҙың доклад һәм лекцияларҙы [illegible].

«Алға», Карл Маркс исемендәге колхоздарҙың агитколлективтары [illegible].

Ләкин хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште йәйелдереүҙә етешһеҙлектәр ҙә күп әле. [illegible]

Беҙ, колхозсылар араһында большевистик агитацияны көсәйтеү, уны йөкмәтке һәм маҡсатҡа ярашлы итеп ойоштороу өсөн бөтә сараларҙы күрәбеҙ.

А. Ардеев,
ВКП(б)-ның Шишмә райкомы секретаре.

Бөтә тракторҙарҙы ла тулы ҡеүәтендә файҙаланырға!

Һан да, сифат та юҡ

БАЙМАҠ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Баймаҡ МТС-ындағы бөтә 45 трактор ҙа хәҙер колхоздарҙа. Ләкин уларҙың бөтәһе лә эшләй алмайҙар. [illegible]

[illegible]

МТС-тың «Кубань» колхозындағы тракторы ла эшләй алмай тора. [illegible]

7 майға тиклем МТС-та 180 гектар ғына ер һөрөлдө. [illegible]

Яҙғы баҫыу эшенә насар әҙерләнеү, машиналарҙы сифатһыҙ ремонтлау Баймаҡ МТС-ын бында ла артта ҡалдырҙы. [illegible] МТС директоры иптәш Кадиров трактор бригадаларының эше менән ҡыҙыҡһынмай, механик трактористарға ярҙам күрһәтмәйҙәр, МТС-тың өлкән агрономы иптәш Акимов ҙа баҫыуҙарға сыҡмай.

И. Зарипов.

Һабансылар көнөнә бөрәр гектар ер һөрәләр

Колхоз председателе иптәш Карамов агротехник, бригадир һәм звеноводтар менән бергә баҫыуҙарҙы ҡарарға сыҡты.

— Был ер һөрөргә өлгөргән. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ? — тине ул.

Орлоҡ участкаһы звеноһының етәксеһе иптәш Гилданова, председателдең фекерен дөрөҫләп:

— Беҙгә баҫыуҙы ҡуллайтыу ярамай. Ерҙә дым күп саҡта сәсеп ҡалыу яҡшыраҡ. Өлгөргән ерҙәрҙе һайлап һөрә башларға кәрәк, — тине.

Иртәгәһенә колхозсылар бик иртә уянып, алты һабан баҫыуға сыҡтылар. Алдан билдәләнгән урындарҙа ерҙәрҙе һайлап һөрөү эше башланды. Һабансы Фәтих Фәттахов тәүге көндә 1 гектар ер һөрҙө. Ике көн эсендә колхозда 7 гектар ер һөрөлдө.

Ҡариҙел районының башҡа колхоздарында ла яҙғы баҫыу эштәре башланды. «Урал» һәм «Большевик» колхоздарында һайлап һөрөү бара. «Ударник» һәм Жуков исемендәге колхоздарҙа 15 гектар ер һөрөлдө.

Районда баҫыу эштәре көндән-көн киң йәйелә һәм ҡыҙа бара.

Ғ. Исмәғилев.

Эш нормалары арттырылып үтәлә

Байғужа МТС-ы механизаторҙары үткән йылдарҙағы кеүек үк быйыл ла яҙғы баҫыу эштәренә ойошҡан рәүештә һәм тулы әҙерлек менән башланылар.

Үткән йыл МТС буйынса шартлы һәр бер трактора уртаса 788 гектар ер эшкәртелде, быйыл трактористар көнөнә 1000-әр гектар ер эшкәртеү, үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарға 1000 гектар майҙанда арыштан һәр бер гектарынан 20-шәр центнер урожай үҫтереү йөкләмәһен алдылар.

Хәҙер трактористар алған йөкләмәләрен утәү өсөн колхоз баҫыуҙарында төнөк әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ ҡыҙыу эш алып баралар. Смена заданиеһен арттырып үтәү, ерҙе яҡшы эшкәртеү өсөн ярыш киң йәйелдерелде. МТС-тың 29 трактор тракторы ла тәүлегенә көнөнә 20 сәғәт эшләй. Трактористар хеҙмәт етештереүсәнлеген көндән-көн арттыра баралар. Улар баҫыу эштәрен башлаған 1 майҙан 8 майға тиклем ер эшкәртеү буйынса графикты 106, ә колхоздар 113 һәм өстәмә колхозда 116 процентҡа үтәнеләр.

Иптәш Зияғов етәкселек иткән трактор бригадаһы ярышта алда бара. Был бригаданың иң яҡшы трактористкаһы Нурғәлиева, Нәбиуллин иптәштәр смена заданиеларын 120—125 процентҡа үтәйҙәр. Бригада быйыл 100 гектар майҙанда арыштан һәр бер 150 гектар майҙанда бойҙайҙан көнөнә 20-шәр центнер урожай алыуға һүҙ бирҙе.

Бөтә трактор бригадаларында ла эштең сифатына — ерҙе таран итеп, сей ҡалдырмай һөрөүгә, яҡшы итеп сәсеүгә һәм тырматыуға ныҡлы иғтибар бирелә. Агротехник ҡағиҙәләрҙе аҙ ғына боҙоу фактылары ла шунда уҡ тикшерелә, ғәйепле кешеләр ныҡлы тәртипкә алына һәм ул етешһеҙлектәр бөтөрелә.

Көндәлек эш нормаһын үтәмәү трактористар тарафынан зур хурлыҡ итеп ҡарала. Мәҫәлән, икенсе номерле трактор бригадаһы тракторсы иптәш Гилманов тәүге көндәрҙә тәүге сменала эшләп, 15 гектар урынына, 13 гектар майҙанда культивация үткәрҙе. Был факт трактористарҙың производстволар кәңәшмәһендә тикшерелде. Иптәш Гилмановты кәңәшмәлә үҙенең иптәштәренә яҡшы эшләргә һүҙ бирҙе һәм икенсе көндө уҡ бөтә сменала заданиеһын арттырып утәне.

Бөтә трактор бригадалары ла үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙағы баҫыусылык бригадаларына, звенолар менән берҙәм эшләйҙәр. Арыштан юғары урожай алыу өсөн 700 гектар майҙанда уҡым сәсеүлегенә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде һәм 2500 гектар уҡымды тырматылды. Был эште башкарыуҙа МТС агрономдары иптәш Яртеев, Әхмәтов иптәштәр бригадаларға ҙур ярҙам күрһәттеләр.

МТС коллективы яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн Янаул МТС-ы механизаторҙары менән ярыша.

М. Фәтихов.

Өфө районы Молотов исемендәге колхоз яҙғы сәсеү эшен ҡыҙыу темп менән башлап, 70 гектар майҙанға ашлыҡ сәсте лә инде.
Һүрәттә: Булгаков МТС-ы трактористкаһы иптәш Дардыгина үҙ бригадаһы менән эш өҫтөндә.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Баҫыу эштәре тарҡау бара

АҠЪЯР. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Аҡъяр бөртөклө ашлыҡ совхозында яҙғы баҫыу эше тарҡау рәүештә башланды. Бүлексәләргә өлгөргән ерҙәрҙе һайлап һөрөү түгел, тотош массивтар өлгөрһә лә, эш ҡарөгенсә ойошторолманы.

Икенсе номерле бүлексәлә (управляющие иптәш Чекмеев) 5 трактор 29 апрелдә баҫыуға сыҡһа ла, бөгөнгә тиклем рәтләп эшләгәне юҡ. Ә Григорьев һәм Копкин иптәштәр етәкселек иткән бүлексәләргә тракторҙар тик 5 майҙа ғына баҫыуға сыҡтылар. Ләкин улар ҙа әле булһа эшләмәйҙәр. Машиналарҙы бер урындан икенсе урынға күсереп йөрөтөү арҡаһында 3 трактор эшкә башлауҙан алда уҡ стройҙан сыҡты, күп простой яһаны. Совхоз механиктәре баҫыуҙарға булмайҙар, күсмә мастерской трактористарға ярҙам күрһәтмәй. Ғөмүмән совхоз специалистәре баҫыу эшенән ситтә торалар.

Партия ойошмаһы (секретаре иптәш Жаров) яҙғы сәсеү осоро өсөн төҙөлгән политик-массовый эш планын тормошҡа ашырыу өсөн көрәшмәй. Баҫыу стандары йыһазландырылмаған, плакаттар һәм лозунгылар, ярыш таҡтаһы юҡ. Стена газеталары сығарылмай. Трактористар араһында социалистик ярыш ойошторолмаған. Улар көндәлек норманы ла, сезон заданиеһын да белмәйҙәр.

Совхоз директоры иптәш Лихоманов баҫыу эштәренең өҙөклекһеҙ барыуы өсөн борсолмай. Ул 2570 гектар майҙанда яҙғы сәсеү үткәреүҙе 25 көнгә планлаштырған да, ваҡыт бар әле, тип яҡшы сроктарҙы бушҡа уҙғара.

Совхозда тракторҙарҙан башҡа, баҫыу эштәрендә ҡатнашырлыҡ күп кенә йәнле тартыу көстәре бар. Ләкин улар бөтөнләй тип әйтерлек файҙаланылмайҙар.

Эштең бына ошолай тарҡау барыуы һөҙөмтәһендә майҙың тәүге биш көнөндә совхозда ни бары 48 гектар ғына ер һөрөлдө, бер генә гектар ҙа ашлыҡ сәселмәне.

Р. Шәфикова.

Сәсеү массовый төҫ алды

ДӘҮЛӘКӘН. 6 майҙа колхоздарҙа яҙғы сәсеү массовый рәүештә йәйелдерелде. «Ҡыҙыл Урал» колхозы яҙғы һөрөү планын үтәне. 175 гектар ер һөрөлдө. Хәҙер ашлыҡ сәселә. Колхозсылар һәр көн 11 — 12 сәғәт эшләйҙәр. Сәсеүсе Зияев, Саматов, Мәликов һәм Шакиров иптәштәр көндәлек норманы 150—165 процентҡа үтәйҙәр.

«Красная поляна» колхозында ла сәсеү графиге һәр көн арттырылып үтәлә. Колхозсылар иртә культураларҙы сәсеүҙе 13 майға тамамлау өсөн көрәшәләр.

Районда инде 4000 гектар ашлыҡ сәселде.

Техникала рус кешеләренең беренселеге

Әгәр буржуаз матбуғатҡа ышанһаң, бөйөк уйлап сығарыуҙарҙы ижад итеүселәр йә Көнбайыш Европа, йә Америка кешеләре булып сыға: йәнәһе пар машинаһын инглизсән-Уатт, электр яҡтылығын Америка кешеһе Эдисон, самолетты шул уҡ американы В. һәм О. Райттар, радионы Италия кешеһе Маркони уйлап сығарған була... Буржуаз ялғансылар мәсьәләне бына нисек ҡуялар: имеш, техниканы үҫтереүселәр американлылар, инглизсәндәр, немецтар, итальяндар, теләһә кем булһын, тик рустар ғына түгел.

АҠШ маҡтансыҡтары үҙҙәренең техника өлкәһендә өҫтөнлөктәре тураһында сәсрәнләп ялғанлауҙа рекорд алалар.

Кешелек донъяһының киләсәгенә юл һалған социализм иленә ҡаршы көрәштә буржуаз матбуғаттан булған ялағайсылар беҙҙең халыҡтың хәҙергеһен генә түгел, уның үткәндәрен дә ялғанлап күрһәтергә тырышалар. Улар беҙҙең ҡайһы бер артта ҡалған интеллигенция араһында буржуазия культураһы алдында баш эйеүселекте шул юл менән [illegible] тоталар. Был иҫәптәр емерелеүгә дусар ителгәнләр. Совет кешеләре, илебеҙ ижад итә белеү менән бергә, рус халҡының ҙур ижадтарҙағы беренселеккә булған закон хоҡуҡтарын да яҡлай беләләр.

Мәҫәлән, инглизсән Уатт беренсе пар машинаһын барлыҡҡа килтерҙе тиеп һанаһа беҙҙә һалдат улы Иван Ползунов тураһындағы хәҡиҡәт ҡапма-ҡаршы тора. Донъяла беренсе пар машинаһын ижад итеүсе ана шул Иван Ползунов булды.

Архивтарҙан табып алынған документтар, 1763 йылда уҡ Ползуновтың үҙе ижад иткән эш тураһында сығыш [illegible]. Ул, үҙ һүҙе менән әйткәндә: «Уттың машинаға хеҙмәтсе итеп ҡулдырға» тәҡдим иткән. Ул, 1765 йылда универсаль пар двигателе идеяһын алға һөрөп, шул ваҡыттағы заводтар өсөн донъяла беренсе йылылыҡ көсө установкаһы төҙөүҙе тамамланы. Егерме йылдан артыҡ ваҡыт уҙғас ҡына инглизсән Уатт рус новаторы эшләп тамамлаған эште ҡабатланы. Һәм бер, хәҙерге заман индустрияһы үҫешендә нигеҙ булған техник средство — беренсе пар машинаһын тәү башлап уйлап сығарыусы рус кешеһе булды, тип ғорурлыҡ менән әйтәбеҙ.

И. И. Ползуновтың ижади подвиге уның замандаштарының гүзәл эштәре менән ҡушылып китте. Был сафта ер аҫты гидростанцияһын һәм беренсе завод-автоматты ижад итеүсе—Механик һәм гидротехник Козьма Дмитриевич Фролов; фәнни приборҙар, механик судно, бик яҡшы күпер проекттары уйлап сығарыусы — механик Иван Петрович Кулибин; сәғәт тә, булыуҙар ҙа яһауы менән замандаштарын һоҡландырған химик һәм механик Терентий Иванович Волосков бар.

XVIII быуатта техникалағы гүзәл уңыштарға ирешкән был рус новаторҙарына бөтә донъя фәнни фекерҙәренең гение Михаил Васильевич Ломоносов етәкселек итте. Техниканың үпарлаған тармаҡтары: тау эштәре, металлургия, машиналар төҙөү, керамика, быяла һәм дары эше, приборҙар эшләп сығарыу һәм башҡалар уның ижадтары менән байытылды. Уның 1754 йылда уҡ әле беренсе булып геликоптер машинаһының проекты менән сығыш яһауы был ғалимдың гениаль көсө тураһында һөйләргә мөмкинлек бирә. Геликоптер һауа винте менән хәрәкәткә килтерелеүсе, һауала осоу өсөн булған машина ине. Ломоносов уйлап сығарған геликоптер машинаһы үҙ заманынан ике йөҙ йылға тип әйтерлек уҙып китте. Һәм был һауа машинаһы тик беҙҙең көндәрҙә генә төҙөлә башланы.

Ломоносов һәм уның замандаштары алыҫҡа ҡарауҙары, үҙҙәренең ижади подвигтәрен ғәмәлгә ашырыуҙары менән рус ижадының алдағы быуатта ла үҫеүенә ҡеүәтле нигеҙ һалдылар.

Ләкин, билдәле булғанынса, үҙенең уйлап сығарыуҙарын һәм ижад иткән хеҙмәтәрен бөтә ҡөйөм кешелек өсөн биргән Ломоносовты сит илдәрҙә ихтирам итмәнеләр. Уның химия өлкәһендәге асышын Француз Лавуазье иҫәбенә яҙҙылар. Уның техника өлкәһендәге уйлап сығарыуҙарын төрлө сит ил кешеләренең эштәре итеп нрла[illegible] совет ғалимдарына фән [illegible] ға күп һандағы асыш [illegible] ғарлыуҙарҙа Ломоносов тураһындағы хәҡиҡәт [illegible] рыу өсөн күп хеҙмәт килде.

Диңгеҙ аръяғындағы [illegible] электр яҡтылығын да уйлап сығарҙы» тип [illegible]

Был мәсьәләгә тулы [illegible] күтәл түгел генә [illegible] Үҙәк Башҡарма Комит[illegible] 1935 йылда Серго Ор[illegible] лады буйынса, 1802 [illegible] ҙөндә беренсе булып [illegible] тырыу мөмкинлеген [illegible] ренсе рус электротехни[illegible] ровтың иҫәләгенә мон[illegible] дырыу тураһында ҡар[illegible] Петров башлаған эш[illegible] ры дауам иттерҙеләр [illegible] Александр Николаевич [illegible] сығарған лампа — [illegible] электрик лампаһы [illegible] йылда Павел Николаевич [illegible] лап сығарған «электр [illegible] лампа. Лодыгиндең [illegible] электр менән яҡты[illegible] практикала файҙалан[illegible] яраҡлы приборҙар бу[illegible]

Америка ялғансыла[illegible] дағы электрик телеграфын Морзе уйлап сығарҙы, тип яҙалар. Ә документтар уның бер йыл элек үк Россияла электрик телеграф линияһының эшләгәнен иҫбат итәләр.

Башҡа кешеләрҙең уйлап сығарыуҙарын үҙләштереү буйынса Америка мастерҙәре самолетты 1903 йылда бер туған О. һәм В. Райттар уйлап сығарҙылар, тип күрһәтәләр. Инглизсәндәр үҙҙәренең ватандашы Максим тарафынан 1894 йылда төҙөлгән самолет беренсе самолет булды тиҙәр, ә француздар 1890 йылда уларҙың ватандашы Адер төҙөгән самолетты беренсе самолет булды тип иҫәпләйҙәр. США, Англия, Франция һәм башҡа теләһә ҡай[illegible]

[illegible] сығарыу кәрәклеген [illegible] рәүештә талап итте [illegible] рҙәр халҡының үҙ [illegible] рәүештә белдереүен [illegible] өсөн мәжбүри шарт [illegible] тип иҫәпләне. Билдә[illegible] [illegible] Совет делегация[illegible] [illegible] сентябрендә үк [illegible] Совет-Америка ко[illegible] [illegible] ғаскәрҙәрҙе сығара[illegible] 1948 йыл башына [illegible] тәҡдим итеп, шундай [illegible] кдергәйне. Был тәҡ[illegible] делегацияһы тарафы[illegible] [illegible] октябрендә Берләштәр ойошмаһы Генераль Ассамблеяһы сессия[illegible] [illegible] ҡабатланғайны. [illegible] Хөкүмәтенең был [illegible] ҡабул ителмәне.

[illegible] Хөкүмәте, Кореянан [illegible] ҙәре лә бер үк ва[illegible] [illegible] ған шартта, Корея[illegible] [illegible] рҙәрен сығарыуҙы һис [illegible] тормошҡа ашырырға

[illegible] тар, обогатителдәр, [illegible] шартлатыусылар, [illegible] тәр, химиктәр, бора[illegible] лар, хеҙмәт буйынса [illegible] мистәр, геологтар, [illegible] тар, геодезистар, ме[illegible] картографтар, гид[illegible] тар.

Техниктар: [illegible] тәре, маркшейдерҙар, [illegible] тромеханиктәр, [illegible] шартлатыусылар, ге[illegible] минералогтар, гео[illegible] геологтар, метеороло[illegible] эше нормировщиктәр[illegible] лаусылар, физикта[illegible] тәр, химиктәр, то[illegible] һәм картографтар. [illegible] тор эше техниктәре [illegible] техниктәр, механикт[illegible] коваторҙар һәм диз[illegible] йынса), конструкто[illegible] таллургтар, хеҙмәт [illegible] экономистар, радист[illegible]

Врачтар: [illegible] медицина фельдшел[illegible] дицина сестралары [illegible] шеркалар.

[illegible] ҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм [illegible] 30-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29.

Өлкә газета-журналдар типографияһы.

дауам иттергән Владимир Григорьевич Шухов 1886—1891 йылдарҙа нефть крекингенең төрлө ысулдарына өс привилегия алды. Рус ғалиме американлыларҙы һәм тиҙендә сирек быуатҡа уҙып китте.

Бындай фактылар бик күп. Беҙ документтарға таяныу: гальванопластиканы рус кешеһе уйлап сығарған, теплоход һәм электроход Россияла барлыҡҡа килгән, радио—Александр Степанович Поповтың кешелек донъяһына биргән бүләге, тип бөтә донъяға әйтәбеҙ.

Быларҙың бөтәһе лә бөйөк рус халҡының ижади көсөнөң сикһеҙ ҡеүәте тураһында һөйләй. Беҙҙең юғарыла әйтеп кителгән уйлап сығарыуҙарҙың бөтәһе паризм ваҡытында — халҡты ҡыҫып һәм быуып килгән, талант тарҙы һәләк иткән һәм иҙгән, рус кешеләренең уйлап сығарған ҙур эштәрен йыш ҡына архивка ырғытҡан паризм хакимлек иткән ваҡытта эшләнгәнлектәрен онотоға ярамай. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, алдынғы рус кешеләре хатта батша Россияһында ла яңыны ғәйәт ҙур көс менән ижад иттеләр һәм хәҙер бик күп промышленность тармаҡтары уларҙың фән һәм техника өлкәһендәге асыштарына, уйлап табыуҙарына нигеҙләнә. Күп машиналарҙың өҫтөнә «Россияла уйлап сығарылған» тип яҙылырға тейеш.

Хәҙерге заманның бөтә донъя анилин-буяу промышленносе 1842 йылда Николай Николаевич Зинин уйлап тапҡан оригиналь ысулға нигеҙләнә.

Донъялағы хәҙерге заман алтын металлургияһы был ҡиммәтле металды ҡомдан һәм руданан сығарыуға нигеҙләнә, быны ижад итеүсе Петр Романович Багратион булды. Аэродинамиканың нигеҙ һалыусылары — Николай Егорович Жуковский һәм Сергей Алексеевич Чаплыгин самолеттар өсөн ҡанаттар [illegible] һәм [illegible] бирҙеләр. Тимал [illegible] тураһында ҡыҫҡа һәм аныҡ итеп —рус ҡанаттары — тип әйтергә беҙҙең тулы хаҡыбыҙ бар.

Һәр бер стратостаттың осоуы иң тәү башлап 1875 йылда гениаль Дмитрий Иванович Менделеев тарафынан тәҡдим ителгән һамәне тормошҡа ашыра. Д. И. Менделеев элементтарҙың периодик системаһынан алып күмерҙе ер аҫтында газификациялауға тиклем бик күп фән, техника өлкәһендәге бөйөк асыш бирҙәр һәм уйлап сығарыуҙар авторы.

Планеталар-ара корабль ерҙән айға осҡас (ә уның буласағын беҙ беләбеҙ) бында ла беренселек рустарҙа буласаҡ. Әле 1903 йылда уҡ, Константин Эдуардович Циолковский бөтә донъяла беренсе булып реактив хәрәкәттең үҙе тарафынан эшләнеп тамамланған теорияһын матбуғатта иғлан итте. Ә был теория хәҙерге заман реактив техниканың нигеҙенә һалынды, шуның менән бергә Циолковский реактив планета-ара корабльдең проектын эшләп бирҙе.

Беҙ үҙебеҙҙең ижад итеүсе халҡыбыҙҙың героик үткәндәре менән ғорурланабыҙ. Партия һәм хөкүмәттең тәрбиәләүе һөҙөмтәһендә фән һәм техниканың сәскә атыуы өсөн бөтә донъяла беренсе тапҡыр беҙҙең Тыуған илебеҙҙә генә бөтә шарттар тыуҙырылған хәҙергебеҙ менән ғорурланабыҙ. Синтетик каучуктың да, тиҙ үтеүсе тоҡты техникала ҡулланыуҙың да һәм иң ҡаты ҡороста электр эсеҡдары ҡуллаһында йомшаҡ тимер менән киҫеү ысулдарының да һәм башҡа күп асыштарҙың, уйлап сығарыуҙарҙың да тыуған иле булған Советтар илендә ижад ынтылыш һаман күбәреп үҫә бара.

Совет ғалимдәре, үҙ халҡының, бөйөк халҡтың, яңы халҡтың, ижади халҡтың алдынғы традицияларына тоғро, тағы ла көсөркәнешлерәк эшләп, батырлыҡтар күрһәтерҙәр, ижад итерҙәр.

Сталин премияһы лауреаты профессор В. В. ДАНИЛЕВСКИЙ.

Башҡортостан урманлы республика исемен юғары тоторға тейеш

Урожайҙы күтәреүҙә мөһим сара

Баҫыу һаҡлау урман полосаларының урожайлылыҡты күтәреүҙә роле бик ҙур. Уны Шөнгәк-күл тәжрибә баҫыуы работниктәренең эш тәжрибәһенән дә яҡшы күреп була. Мәҫәлән, 1947 йылда урман полосаһы менән уратып алынған киҙәнгә сәселгән арыштың һәр гектарынан 14 центнер, бойҙайҙан 6,9 центнер, һолонан 8,9 центнер өҫтәмә урожай алынды. Бүздәк районының «Алға» һәм Ленин исемендәге, Дәүләкән районының «Парижская коммуна», Стәрлетамаҡ районының Шевченко исемендәге колхоздары һәм башҡа күп кенә колхоздар баҫыу һаҡлау полосалары менән уратып алынған сәсеүлектәрҙән юғары урожай алдылар. Был миҫалдар баҫыу һаҡлау урман полосалары урожайҙы күтәреүҙә мөһим сараларҙың береһе икәнлеге тураһында һөйләйҙәр.

Быйыл Башҡортостан колхоздарына баҫыу һаҡлау полосаларына ағас ултыртыу буйынса ҙурайтылған план бирелгән. Ихе мең гектар майҙанда яңынан ағастар ултыртыу, башлап килгән 1500 гектар урман полосаһында ремонт эштәре һәм өҫтәп ағас ултыртыу бурысы тора.

Баҫыу һаҡлау полосаларына ағас ултыртыуҙа 34 район ҡатнашырға һәм был эштең 70—80 проценте яҙғы осорҙа үткәрелергә тейеш.

Был планды тормошҡа ашырыу өсөн район ауыл хужалығы бүлектәре тарафынан курстарҙа 220 колхоз лесомелиораторҙары әҙерләнде. 10 районда колхоздар менән госпитомниктәр араһында договорҙар төҙөү тамамланды. Бүздәк районының колхоздары үҙ питомниктәрендә әҙерләнгән ағас ултыртыу материалдары менән үҙҙәрен тулыһынса тәьмин итәләр.

Башҡортостан колхоздарында сталинсе яңы биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылында юғары урожай өсөн көсөркәнешле көрәш бара. Был осор шулай уҡ баҫыу һаҡлау полосаларына ағас ултыртыуҙа ла яуаплы булып тора. Урожайҙы күтәреүҙә мөһим сығанаҡ булған баҫыуҙарға ағас ултыртыу эшен һис киҫекмәҫтән йәйелдереп ебәрергә кәрәк.

А. Сухов.

Өфө ҡалаһының Киров районы хеҙмәтсәндәре «Урман аҙнаһын» үткәреүҙә айырыуса актив ҡатнашлыҡ итәләр.

Һүрәттә: Цюрупа урамындағы 39-сы номерлы йортта тороусылар ағас ултырталар.

В. Жданов фотоһы.

Урмансылар

Тауҙар араһынан аҡҡан Аяз йылғаһының Ҡариҙелгә ҡойған, Асҡын леспромхозынан алыҫ булмаған урында буяулы өс тәҙрәһе юлға ҡараған матур өй ултыра. Ул урман һаҡсыһы өйө. Әйләнәһе ҡойма менән уратылған, матур ағастар баҡсала 10 дана һыу умарта.

80 йәштәге Евлампий Иванович Поляков ошо урында 51 йыл йәшәй. Уға государство пенсияһы сығырға ла ваҡыт инде. Ләкин Евлампий Иванович улай түгел, ул үҙенең һөйгән эшен ташларға теләмәй. Ярты быуат буйына бер лесничествола эшләүсе ҡарт, урман менән айырылыу уйы түгел. Уға һәр бер ағас, ҡыуаҡлыҡ, һуҡмаҡ таныш. Тирә-яҡтағы кешеләр ҡартты атап тына «урмансы» тип йөрөтмәйҙәр.

Поляков — Асҡын лесхозының иң яҡшы леснигы. Ҡарт күкрәгендәге Ватан һуғышы осоронда батыр хеҙмәте өсөн медале уның намыҫлы хеҙмәтен баҫа. Урман промышленноҫы министрының ҡарт урмансыға персональ пенсия билдәләү тураһындағы ҡарары ла уға шулай уҡ. Урман һаҡсыһы булып 51 йыл эшләгән осоронда ул бер генә янғын ваҡиғаһына ла юл ҡуймаһын.

Үткән йыл шундай ваҡиға булды — 120-се кварталда ағастар ҡырҡылған. Евлампий Иванович колхозсылар йыйылышына килә. Башта янғынсыны эҙләй.

— Бына нәмә туғандар, — тине ул, — тураһын әйтегеҙ, 120-се кварталда ағасты кем ҡырҡҡан? Танымағыҙ, юҡһа мин ғәйеплене барыбер табам...

Бер колхозсы ғәжәпләнеп урынынан торҙо.

— Ғафү итегеҙ инде. Евлампий Иванович, мин ғәйепле, — тине.

— Улай эшләргә ярамай, ағасты 50 йыл үҫтерергә кәрәк, ә һин биш минут эсендә юк иткәнһең.

Урманды һөйөп һаҡлаусы ҡарттың был һүҙҙәре колхозсыларға тәьҫир яһамау мөмкин түгел.

Башҡортостан урмандарында бындай намыҫлы лесниктар аҙ түгел. Уҡалы лесхозының объездчигы Әхмәдулла Шәмиғулов урман һаҡлауҙа 25 йыл эшләй. Урмансы М. Сәйфуллин уның турында былай ти:

— Шәмиғулов участкаһында тәртип алғола. Унда янғынға ҡаршы һыуыҡ алынды. 30 метр бейеклегендәге вышкалар булдырылған. Шулай өсөн дә унда янғын ваҡиғалары булғаны юҡ.

Мишкә лесничествоһының 8-се участкаһында лесник Янбаев ете йыл инде бер генә янғын ваҡиғаһына ла юл ҡуймай. Тикшереү ваҡытында уның участкаһында урманды ҡырҡыуҙан уйнап та ағас табылманы. Ул колхозсыларҙан ирекле рәүештә янғынға ҡаршы ете дружина ойошторған.

Республикала урман хужалығы системаһында йәне-тәне менән бирелеп эшләүселәр бының менән генә сикләнмәй. Иҙрәкле лесничествоһының иң яҡшы объездчигы, Советтар Союзы Геройы Степанов үҙ участкаһындағы урмандарҙы әйбәт тәрбиәләгәне һәм таҙа тотҡаны өсөн СССР Урман хужалығы министрлығы тарафынан почет грамотаһы менән наградланды.

Лесниктар һәм объездчиктар урман һаҡлау эше менән бергә урман ултыртыу эштәрен дә ойошторалар, ағас орлоҡтарын йыйнайҙар һәм әҙерләйҙәр.

Урман — халыҡ достояниеһе, государствобыҙҙың алтын фонды. Ә был алтын фондын һаҡлаусы булыу, — почетлы эш ул.

Н. Ртищев.

Һәр бер граждандың маҡтаулы бурысы

Урман байлыҡтарын һаҡлауға, ҡалаларҙы, эшселәр поселкаларын, ауылдарҙы йәшелләндереүгә, ялан райондарҙа урман полосалары ултыртыуға йүнәлтелгән «Урман аҙнаһы» ҙур әһәмиәтле бурыс булып тора. «Урман аҙнаһында» Башҡортостан урман хужалығы управлениеһе системаһы буйынса 5 мең гектарға яҡын майҙанға ағас ултыртыу һәм орлоҡ сәсеү, 4 мең гектар самаһы майҙанда тәбиғи рәүештә үҫеүгә булышлыҡ итеү күҙҙә тотола.

Киләһе йылдар өсөн ултыртыу материалдары әҙерләү маҡсатында быйыл яҙғы осорҙа 111 гектар майҙанда урман питомниктәре булдырылырға тейеш. Ошо уңай менән лесхоздарҙың питомниктар майҙаны, 1946 йыл менән сағыштырғанда, ике ярым тапҡыр киңәйтелә. Уларҙың бөтә майҙаны 300 гектар самаһын тәшкил итәсәк. Был питомниктар ултыртыу өсөн йыл һайын ике миллион төп ағас бирә торасаҡ.

Урман культураларын һаҡлау маҡсатында яҙ һәм йәйге осорҙа 40 мең гектар майҙанда элек ултыртылған ағас араларын йомшартыу һәм сүп үләндәренән таҙартыу эштәрен башҡарыу күҙҙә тотола. Ағас ултыртыу эштәрен үтәү өсөн 1948 йылда хөкүмәт государство бюджетынан республикабыҙға ҙур миллион һумдан артыҡ средство бүлде. Был һандар беҙҙең социалистик государствобыҙ тарафынан урман хужалығына, ҡалаларҙы, район үҙәктәрен һәм ауылдарҙы йәшелләндереүгә, ялан райондарындағы баҫыуҙарҙы урман полосалары менән солғап алыуға иң тиклем ҙур әһәмиәт бирелгәнен үҙе үк күрһәтеп тора. Был, шулай уҡ, урындағы совет, партия, комсомол, профсоюз ойошмаларының һәм бөтә общественностең ошо сараларҙы тормошҡа ашырыуға ниндәй иғтибар бирергә тейеш икәнлеген күрһәтә.

Иглин, Бәләбәй, Шишмә, Бөрө, Стәрлетамаҡ, Туймазы райондары ағастарҙы һайлап ултыртыуға байрам көндәрендә үк башланылар. 6 майға тотош республика күләмендә барлығы 500 гектарҙан артыҡ майҙанға ағас ултыртылды һәм сәселде. Ошо ваҡыт эсендә ултыртыу өсөн питомниктарҙан 6 миллион төп ағас ҡаҙып алынды. Урман хужалығы управлениеһе ҡарамағындағы 43 лесхоздан ағас ултыртыуға 22-һе башланы.

Иглин, Тау-төмән лесничестволарында тупраҡтың тотош киҫеүен көтөп тормайынса, һайлап ултыртыуға күсәләр. Бында ағас ултыртыуҙа эшләүселәр өсөн туҡланыу пункттары ойошторолған. Иглин районында «Алға» уңайы менән район үҙәгендә йәшелләндереү эштәре, ултыртыу материалдары һәм ултыртыу урындары алдан әҙерләнде. Һәм хәҙер уны общественностең ҡатнашлығында урамдарға ағас ултыртыу эштәре бара.

Ләкин ҡайһы бер урындарҙа лесхоз работниктәре бик аҡрын ҡуҙғалалар, тупраҡтың тотош киҫеүен көтөп, «өлгөрәләп» настроениеһенә бирелгәндәр. Уҙайҙар иҫәбенә Бишбүләк, Ҡыйы, Маҡар лесхоздарын индереүгә мөмкин.

Бындай «еңелсәк» настроениеларҙы бөтөрөргә, ағас ултыртыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта тамамларға кәрәк. Бурыс — ҡалаларҙы, эшселәр поселкаларын, ауылдарҙы йәшелләндереүгә бөтә общественносте мобилизациялауҙан тора. Һәр бер йорт алдын, колхоз, мәктәп, больница территорияларын, парктарҙы һәм баҡсаларҙы төрлө ағастар—алма, муйыл, сейә ағастары, ҡурай еләге, ҡарағат ҡыуаҡлыҡтары менән солғап алырға кәрәк. Комсомолецтар, пионерҙар, мәктәп уҡыусылары бында ҙур булышлыҡ күрһәтә алалар. Урындағы совет, партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының практик ярҙамында урман хужалығы работниктәре был маҡтаулы эштең инициаторҙары булырға тейештәр.

Г. Әмир.

1948 йылдың апрель айында тракторҙарға һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр эшләп сығарыу планының үтәлеше

ВКП(б) Өлкә Комитеты һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы тарафынан II кварталда тракторҙарға һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр эшләп сығарыуҙа билдәләнгән план 1948 йылдың 1 майына тракторҙар буйынса 28,2 процентҡа һәм ауыл хужалығы машиналары буйынса 21,5 процентҡа үтәлде.

Запас частәр эшләп сығарыу буйынса икенсе квартал планы ла уңышлы үтәлә: директоры иптәш Гуцайт булған заводта II квартал заданиеһы — 75,4 процентҡа, директоры иптәш Родзюк булған заводта — 138 процентҡа, директоры иптәш Карпов булған төҙөлөш машиналары заводында — 52 процентҡа, директоры иптәш Штерин булған тау оборудованиелары заводында—70 процентҡа, директоры иптәш Овчаренко булған Белорет металлургия комбинатында — 45 процентҡа, директоры иптәш Ракитин булған яҙыу машиналары заводында — 59 процентҡа үтәлде.

Директоры иптәш Посылкин булған Ишембай нефть машиналары төҙөү заводында, директоры иптәш Гулин булған «Автотракторадеталь» заводында, директоры иптәш Нодельман булған ҡорос-сыбыҡ заводында, директоры иптәш Кулик булған Стәрлетамаҡ ремонт заводында апрелдә тракторҙарға һәм ауыл хужалығы машиналарына запас частәр эшләүҙең икенсе квартал планын үтәүгә башламағандар.

Икенсе квартал планын ҡәнәғәтләнмәҫлек үтәйҙәр: директоры иптәш Судаков булған Стәрлетамаҡ станоктар төҙөү заводында квартал планы — 21,2 процентҡа, директоры иптәш Алексеенко булған заводта — 7,6 процентҡа, начальнигы иптәш Абдуллин булған Хеҙмәт резервтәре управлениеһе буйынса — 6,4 процентҡа үтәлде.

СССР Госпланының Башҡорт АССР-ы буйынса уполномоченныйы.

Өфө ҡала Советы исполкомында һәм ВКП(б) ҡала комитетында.

Ҡалалағы районларҙың Май алды социалистик ярышы йомғаҡтары тураһында

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитеты бюроһы промышленность предприятиелары тарафынан производство пландарын үтәү буйынса ҡалалағы райондарҙың Май алды социалистик ярыштарына йомғаҡ яһап, предприятиелары апрель айында валовой продукция эшләп сығарыу планын 121,4 процентҡа үтәгән Ленин районын (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Вәлиев, райсовет исполкомы председателе иптәш Сәғитов) ярышта еңеүсе тип таптылар һәм ҡала Советы исполкомының, ВКП(б) ҡала комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бирергә ҡарар иттеләр.

Апрель айы планын 120,5 процентҡа үтәгән Молотов районының (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Мазов, райсовет исполкомы председателе иптәш Чернов) яҡшы эшләүе билдәләп үтелде.

Киров районы (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Капустин, райсовет исполкомы председателе иптәш Шацкая) предприятиеларының сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләүе күрһәтелде. Был райондың промышленность предприятиелары апрель планын бары тик 78,5 процентҡа ғына үтәнеләр.

Ҡала Советы исполкомы һәм партияның ҡала комитеты бюроһы был райондың етәкселәре Капустин һәм Шацкая иптәштәрҙе, витамин, ярма заводтарының һәм «Новый быт» артеленең етәкселәре Әхмәтьянов, Ғөбәйдуллин, Тайнов, Александров һәм Хәбиров иптәштәрҙе пландарҙы үтәмәүҙең сәбәптәрен ентекле тикшерергә, булған етешһеҙлектәрҙе һис киҫекмәҫтән бөтөрөргә һәм һөҙөмтәһе тураһында 20 майға ВКП(б) ҡала комитетына һәм ҡала Советы исполкомына белдерергә мәжбүр иттеләр.

Район газеталары биттәренән

Совет төҙөлөшө

Урындағы Советтарға һайлауҙар үткәрелгәндән һуң күп кенә райондарҙа ауыл Советтарының эштәре байтаҡ яҡшырҙы. Сессиялар билдәләнгән ваҡыттарҙа үткәрелә башланы. Даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар колхоздарҙың культура һәм хужалыҡ эштәрен артабан яҡшыртыу өсөн конкрет саралар күрәләр.

Совет төҙөлөшөн регуляр рәүештә яҡтыртыу ул район газеталарының мөһим бурысы. Большевистик матбуғат Советтарҙың уңышлы эштәрен киң яҡтыртырға, етешһеҙлектәрен тәнҡитләргә, эштәрендә булышлыҡ итергә тейеш.

Абзан районы «Сталинсе» газетаһы был өлкәлә үҙенең бурысын дөрөҫ аңлаған. Ул, Советтарҙың ойоштороу-массовый эштәре буйынса әленән-әле материалдар биреп килә.

«Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Муйнаҡ ауыл Советы—тип яҙа «Сталинсе» газетаһы үҙенең 14-се номерында, — даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың эштәрен ойоштороуға ныҡ иғтибар итә. Культура, һаулыҡ һаҡлау һәм бюджет мәсьәләләре сессия ултырыштарында ҡарала бара. Депутаттар эштә инициатива күрһәтәләр».

«...I кварталда Муйнаҡ ауыл Советында аҡса туплау эштәре насар бара ине. Бюджет комиссияһы етәксеһе, депутат иптәш Сайранова бының сәбәптәрен тикшерҙе... Аҡса туплауҙы көсәйтеү өсөн комиссия члендәрен, совет активтәрен төрлө эш участкаларына беркетте. Масса араһында аңлатыу эштәре алып барҙы. Һөҙөмтәлә, ауыл Советы беренсе квартал аҡса туплау планын районда беренсе булып үтәне».

Газета Юлдыбай ауыл Советы депутаттарының эштәрен дә конкрет фактылар менән яҡтырта. Уларҙың сығыштарын ойоштора, эш тәжрибәләрен уртаҡлаша. Мәҫәлән, ошо ауыл Советының председателе иптәш Хәсәйев «Сталинсе» газетаһындағы мәҡәләһендә:

«...Культура-ағартыу комиссияһы етәксеһе иптәш Киреева инициативаһы менән Эткол ауылында уҡыу өйө ойошторолдо. Һәм уға 400 һумлыҡ төрлө китаптар һатып алынды. Шулай уҡ, район үҙәген һәм ауылдарҙы йәшелләндереү, яңы уҡыу йылына әҙерлек буйынса ла саралар күрелә. Иптәш Киреева масса менән бәйләнеш тота, намыҫ менән эшләй» тип яҙа.

Урман полосалары

«Ҡыҙыл Байраҡ» газетаһы үҙенең һуңғы номерҙарында колхоздарҙа ағас ултыртыу һәм баҫыуҙарҙы һаҡлаусы урман полосаларын киңәйтеү мәсьәләләрен күтәрҙе. Материалдар урынлы һәм ваҡытында бирелгәндәр. Сөнки, Ҡандра районы колхоздары 1948 йылда баҫыуҙарҙы һаҡлаусы полосаларҙы 100 гектарға киңәйтергә тейештәр. Газета колхоз етәкселәре алдына:

«...Баҫыуҙарға ағас ултыртыу буйынса урындарға план төшөрөлдө. Колхоздар йылдам рәүештә госпитомниктән ағастар һатып алырға, участкалар билдәләргә, махсус бригадалар булдырырға тейештәр» тигән бурысты ҡуя.

Икенсе материалда «Урман аҙнаһы» үткәрелеү айҡанлы «Ҡандра» колхозында нәмәләр эшләнеүе тураһында әйтелә.

«... Колхоз быйыл бер гектар майҙанға емеш-еләк ағастары ултыртасаҡ. Бының әҙерлек эштәре тамамланды. Шуның менән бергә, колхозсыларҙың өйҙәре тирәһенә һәм баҡсаларына ултыртыу өсөн дә госпитомниктән 2 мең төп тополь һәм башҡа төр ағастар һатып алынды», — ти газета.

Был фактылар «Ҡыҙыл Байраҡ» газетаһының оператив эшләүен, яңы мәсьәләләр күтәреүен күрһәтәләр.

Башҡалабыҙҙы баҡсаға әйләндерәйек

Партияның Башҡортостан Өлкә Комитеты һәм республика Министрҙәр Советы ҡарары менән иғлан ителгән «Урман аҙнаһы» башҡалабыҙҙың совет, партия, комсомол, профсоюз ойошмаларына, предприятиеларға, хужалыҡ һәм культура учреждениеларына яуаплы бурыстар йөкмәтә. Партияның ҡала комитеты ла «Урман аҙнаһын» үткәреү тураһында конкрет күрһәтмәләр бирҙе.

Аҙнаның тәүге ике көнө ҡалалағы район Советтарының һәм партия райкомдарының етәкселәре был мөһим эшкә тейешле әһәмиәт бирмәгәнлектәрен күрһәтте. Тәүге ике көндә Киров районында тик 385 төп, Жданов районында — 125, Ленин районында — 200 төп ағас ултыртылды. Ә Молотов районында был эшкә бөтөнләй башламанылар. Был, район етәкселәре Чернов һәм Мазов иптәштәрҙең ҡаланы йәшелләндереү эшен баһаламауҙарының һөҙөмтәһе булып тора. Ленин һәм Молотов райондары ултыртыу материалдарын әҙерләү һәм ултыртыу эшен насар ойошторғандар. Райкомхоздарҙың работниктәре был эштән ситтә торалар. Ауыл хужалығы институтының специалистәре, тәжрибәле баҡсасылар йәшелләндереү эшенә мобилизацияланмағандар.

Скверҙарҙы һәм парктарҙы йәшелләндереү эше тағы ла насарыраҡ тора. Парк һәм баҡсалар управлениеһы иптәш Букреев күҙгә күренерлек бер генә сара ла үткәрмәй әле. Ул, Өфө хеҙмәтсәндәренең культуралы ял итеү урындарын тәртипкә килтереүҙә үҙендә яуаплылыҡ һиҙмәй күрәһең.

Ҡаланың комсомол һәм профсоюз ойошмалары, шулай уҡ башҡа общественный ойошмалары һәм күпселек мәктәптәр «Урман аҙнаһын» үткәреүҙә ҡатнашыуҙан ситтә торалар. Ә тейешле инициатива күрһәткәндә был ойошмалар күп нәмә эшләй алалар һәм эшләргә тейештәр ине.

Атымлағы йылда район Советтарының һәм башҡа ойошмаларҙың күп работниктәре ҡаланы йәшелләндереүгә башлауҙың тәүге көндәрендә үк үткәндәге хаталарҙы ҡабатлайҙар. Үҫеүе 20—25 йыл дауам итә торған ағастарҙың ултыртыу материалдары булыуға ҡарамаҫтан, 5—7 йәшкә тиклем генә үҫә торған ағастарҙы ултыртыу юлына баҫалар. Бындай ағастарҙы бигерәк тә үҙәк урамдарҙа ултыртыу һис тә ярамай.

Йәшелләндереү барышында ағастарҙы дөрөҫ ултыртыу мәсьәләһенә тейешле иғтибар бирелмәгәнлеге һиҙелә. Йәшелләндереү тресының етәкселәре ағас ултыртыу эшен алып барыусы работниктәрҙе инструктажлап үткәрмәгәндәр һәм үҙҙәре лә эш урынында һирәк булалар. Тресттың ҡайһы бер работниктәре «урам тар» тигән һылтау менән Ленин урамына ағас ултыртмаҫҡа маташалар. Үҙәк урамдарҙың береһен йәшелләндереүгә бындай ҡараш бөтөнләй урынһыҙ.

Мөһим эштәге был сервә етешһеҙлектәр һис киҫекмәҫтән бөтөрөлөргә тейеш.

Башҡалабыҙҙы йәшелләндереү планында быйыл 9460 төп ағас, 24 мең төп ҡыуаҡлыҡ ултыртыу күҙҙә тотола. Бынан тыш сквер һәм парктарҙа мең төптән артыҡ ағас, 25 мең төптән күберәк ҡыуаҡлыҡ ултыртылырға тейеш.

Тәмәк, эш күләме бәләкәй түгел. Ләкин бының үтәү генә түгел, бәлки арттырып үтәргә кәрәк. Ә мөмкинлектәр күп. Башҡаланың совет, партия, комсомол ойошмалары йәшелләндереү эше менән оператив етәкселек итергә, бөтә общественносте урам, парк, баҡса һәм скверҙарҙы йәшелләндереү сараларын үткәреүгә күтәрергә, промышленность предприятиеларының, учреждениеларҙың һәм ойошмаларҙың коллективтәрен үҙ тротуарҙарын, урамдарын йәшелләндереүгә мобилизацияларға тейештәр.

Элек һәм яңы ултыртылған ағастарҙы кәртәләүҙе яҡын көндәрҙә тамамларға кәрәк. Ултыртылған бөтә ағас учетҡа алынырға, уларҙы һаҡлау, тәрбиәләү айырым кешеләргә, дворниктарға, йорт уполномоченныйҙарына, йорт управляющийҙарына, комендантларға беркетелергә тейеш.

Ағас ултыртыу менән бер рәттән, яҡын көндәрҙә бөтә урамдарҙағы газондарҙы тәртипкә килтерергә кәрәк. Ҡороған ағастар урынына яңылары ултыртылырға тейеш. Ленин районындағы кеүек газондарҙы тимер сыбыҡ менән уратып алыу практикаһына юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Ҡаланы йәшелләндереүҙең әһәмиәте ҙур. Был турала халыҡ араһында систематик рәүештә аңлатыу эше алып барырға, ағастарҙы, газондарҙы тәрбиәләү, һаҡлау буйынса районлар, кварталлар, йорт управлениелары, айырым йорттарҙа йәшәүселәр араһында социалистик ярыш ойоштороп ебәрергә кәрәк. Сөнки «Урман аҙнаһын» уңышлы үткәреү менән бер рәттән ҡаланы йәшелләндереү эшен артабанда ла ныҡышмалы дауам иттерергә тейешбеҙ.

Н. Егоров,

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫары.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Венгрияла эшселәр партияларын берләштереүгә әҙерлек

БУДАПЕШТ, 7 май. (ТАСС). Коммунистәр һәм социал-демократик партияларҙың ҡатнаш политик комиссияһының нәүбәттәге ултырышы булды. Махсус комиссия Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһы программаһы проектын тикшереүгә индерҙе. Был проект фекер алышыуһыҙ тотошо менән ҡабул ителде. Бер нисә көндән һуң берҙәм эшселәр партияһының был программаһы бөтә халыҡҡа иғлан ителәсәк.

Бынан тыш, ҡатнаш политик комиссия ошо уҡ ултырышта эшселәрҙең ике партияһын берләштереү менән бәйләнешле күп кенә мәсьәләләрҙе тикшерҙе, һәм берләшкән съездың көн тәртибен раҫланы. Венгрия компартияһының генеральный секретаре Ракоши Матиас съезда коммунистәр һәм социал-демократтар партияһын берләштереү тураһында доклад менән сығыш яһаясаҡ.

Фәркаш Михай Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһының организацион уставы тураһында доклад яһаясаҡ. Шунан һуң берләшкән съезд яңы партияның үҙәк етәкселеген һәм үҙәк контроль комиссияһын һайлаясаҡ.

„Берләшкән Европа“ тип аталған хәрәкәт конгресенең асылыуы

ГААГА, 7 май. (ТАСС). Бөгөн Гаагала «Берләшкән Европа» тип аталған хәрәкәттең конгресе асылды. Англиянан Черчилль һәм Иден етәкселегендә консерваторҙарҙың ҙур группаһы һәм шулай уҡ лейбористәр группаһы Гаагаға килде. Францияһан элекке премьер-министр Поль Рамадье килде. Уның менән бергә бер нисә федералист тә килде. Голландия делегацияһы башында элекке министр (католик) Керстенс тора. Шулай уҡ Көнбайыш Германиянан вәкилдәр килделәр. Гамбург социал-демократтары конгресҡа ҡатнашыуҙан баш тарттылар. Бельгия делегацияһы башында — Ван Зееланд, Испания делегацияһы башында — Мадарьяга тора.

„Көнбайыш союздың“ экономик пландары тураһында Англия газетаһы

ЛОНДОН, 9 май. (ТАСС). «Дейли Мейл» газетаһының промышленность буйынса күҙәтеүсеһе «көнбайыш союзға» инеүсе державаларҙың экономик эксперттәре бөтә Көнбайыш Европа государстволарының производство ресурстарын берләштереү планы булып тора, тип хәбәр итә. Күҙәтеүсе, был план тураһында Криппс үҙенең күптән түгелге сығышында хәтергә төшөргәйне, тип яҙа. Криппс былай тип белдергән: «көнбайыш союздың» үҫеше Англия промышленносеның башҡа тармаҡтары конкуренциянан азат булған ваҡытта, уның айырым тармаҡтарының эш туҡтатыуына килтереүе мөмкин. Был планды төҙөү өсөн эксперттарға инструкциялар Криппс һәм «көнбайыш союзға» ингән башҡа державаларҙың финанс министрҙәре тарафынан Брюсселдә кәңәшмә барған ваҡытта бирелде. Эксперттәр компетенцияһына,—тип хәбәр итә күҙәтеүсе, — Көнбайыш Европа государстволарының промышленность эштәрен «ҡайтанан ҡороуға» ҡарата рекомендациялар биреү инә:

«Криппстең Англия экономикаһын тамырынан үҙгәртә алырлыҡ саралар тураһындағы белдереүе промышленниктәр өсөн көтелмәгән хәл булды». Күҙәтеүсенең күрһәтеүе буйынса, промышленниктәрҙең милли союз председателе Патрик Хэнко былай тип белдергән: «Был ҡарар беҙҙең өсөн көтөлмәгән хәл һәм алдан консультация яһалмайынса ҡабул ителгән. Беҙ көткән бөтә нәмәләрҙән ул серьез айырыла. Әгәр ҙә көнбайыш союз айырым фабриканттарҙың юғалтыуҙарына ҡоролған булһа, ул саҡта был союз уларҙың күптәренә яңы ҡыйынлыҡтар килтерәсәк».

Криппстең белдереүе шулай уҡ трэд-юниондар конгресе өсөн дә көтөлмәгән хәл булды, тип яҙа күҙәтеүсе. Генсоветтен махсус экономик комитете ваҡиғаларҙың барышын ентекле рәүештә күҙәтәсәк.

Италия полицияһының провокацион хәрәкәте

Туриндә демократик ойошмаларҙың биналарына һөжүм

РИМ, 9 май. (ТАСС). Газеталарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, кисә Туриндә полицияның күп һанлы отрядтәре компартия федерацияһы бинаһына һәм уның бер нисә ҡала секцияһына, эшселәр клубтарына, атап әйткәндә, «Фиат» заводтары эргәһендәге клубтарға һөжүм яһанылар. Баштан аяҡ ҡоралланған полицейскийҙәр тентеүҙәр үткәрҙеләр. Был тентеүҙәр ваҡытында улар погромдар яһанылар, сейфтәрҙе, өҫтәлдәрҙе астылар, ишектәрҙе ваттылар һәм архивтәрҙе аҡтарҙылар. Компартия секцияларының бер нисә етәксеһе, «Фиат» заводы профсоюз комитетенең секретаре Мирафьоре һәм тентеү яһалған йорттарҙың ҡараусылары бөтәһе лә ҡулға алындылар. Социалистик партияның бер секцияһы бинаһына ла һөжүм яһалды.

«Операция» бөткәндән һуң Турин ҡалаһы полицияһының начальниге: «Фиат» заводтарында ошо көндәрҙә юғалған бензин тултырылған мискаләрҙе полиция минең бойороғом буйынса эҙләне, тип белдерҙе. Компартияның ҡулға алынған активистәре төрмәгә ябылғандар.

Иранда аслыҡ ҡурҡынысы

ТЕГЕРАН, 7 май. (ТАСС). Матбуғатта иғлан ителгән хәбәрҙәргә ҡарағанда, Бушрҙа, Персид боғазында икмәк, дөгө һәм башҡа аҙыҡ-түлек продуктылары бөтөнләй юҡ. Массовый аслыҡ ҡурҡынысы һөҙөмтәһендә, Бушрҙа 2 майҙан башлап бөтә учреждениеләр ябылды һәм һәр төрлө сауҙа туҡтатылды. «Дад» газетаһы Бушрҙағе хәлде ҡурҡыныс һәм көсәркәнешле хәл, тип характерлай. Ҡалала һәр төрлө эш туҡтатылған. Урындағы фабриканың 1300 эшсеһе асыға. «Кейхан» газетаһының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, аслыҡтан үлеү ваҡиғалары билдәләнгән.

«Иран» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Мешхедтә һәм уның тирәһендә икмәк хәле шулай уҡ насар. Арпа икмәген дә табырға мөмкин түгел. Крәҫтиәндәр икмәк урынына үлән ашайҙар — Мешхед ҡалаһының үҙендә пекарняларҙың күпселеге ябылған. Баҙарҙа икмәктең хаҡы ике тапҡырға артҡан.

«Эгдам» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ирандың төньяҡ провинцияларында дөгө хаҡы шул тиклем күтәрелгән, уны даими рәүештә ҡулланған халыҡтар хәҙер дөгө һатып ала алмайҙар.

«Сетаре» газетаһы Иран властәрен кәсеҙ һәм эшлекһеҙ булыуҙа ғәйепләй, бойҙай һәм башҡа аҙыҡ-түлек продуктылары бик күп күләмдәрҙә Персид боғазы аша, айырым алғанда шул уҡ аслыҡтан интегеүсе Бушир ҡалаһы һәм илдең көнбайыш секторе аша контрабанда юлы менән Ирандан ситкә сығарыла, быға Ирандың урындағы властәре юл ҡуя һәм уны сығарыуҙа ҡатнашалар, тип күрһәтә.

Берлиндә Еңеү көнө

БЕРЛИН, 9 май. (ТАСС). Совет Армияһының һәләк булған воиндарының памятниктәренә, 9 майҙа — фашистик Германияны еңеүгә өс йыл тулыу көнөндә, веноктар һалынды. Берлинде штурмға тотоу геройҙарына хөрмәт итеү өсөн Германиялағы совет хәрби администрацияһы управлениеләренән, Берлин гарнизонының хәрби частәренән, совет ойошмаларынан һәм башҡа урындарҙан бик күп һанда делегациялар килде. Митингыла сығып һөйләүселәр үҙенең тормошо менән Советтәр Союзының азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон, Европаның бик күп халыҡтарының азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон яҡлаған кешеләрҙең иҫтәлеген хөрмәт иттеләр.

Тантаналы-траурлы марш тауыштары аҫтында делегациялар памятниктәр эргәһенән үттеләр. Был памятниктәр веноктар һәм сәскәләр менән ҡапланған. Бында бынан өс йыл элек һәләк булған һалдаттарҙың һәм офицерҙарҙың исемдәре яҙылған.

Польша, Чехословакия һәм Югославия хәрби миссиялары делегацияһы памятникка веноктар һалды.

Донъя шахмат чемпионаты

Шахмат буйынса донъя беренселегенә матч-турнирҙың 22-се туры 9 майҙа уйналды. Был турҙа донъяның яңы чемпионы тураһындағы мәсьәлә хәл ителде.

Ботвинник—Эйве партияһында ферзь ғамбитенең тыныс варианты уйналды. 15-се йөрештә Ботвинник Эйвега уйынды отошһоҙ бөтөрөү тураһында тәҡдим яһаны. Бер аҙ уйлағандан һуң, Эйве был тәҡдимде ҡабул итте. Шулай итеп, был уйындың отошһоҙ бөтөүе Ботвинникка беренсе урынды тәьмин итте.

Матч-турнирҙың баш судьяһы гроссмейстер Милан Видмар бөгөнгө турҙың икенсе партияһындағы уйынды туҡтатты ла, тамашасыларға түбәндәге белдереү менән мөрәжәғәт итте:

«Бөгөнгө тур һөҙөмтәһендә Советтәр Союзы гроссмейстере Михаил Ботвинник матч-турнирҙа үҙенә беренсе урынды һәм шахмат буйынса донъя чемпионы исемен тәьмин итте».

Залдағылар совет гроссмейстеры донъя чемпионы Михаил Ботвинникте ҡайнар ҡотланылар.

Шунан һуң баш судья турҙың икенсе партияһын — Керес менән Смысловтың уйынын дауам иттерҙе.

22-се турҙан һуң ҡатнашыусыларҙың хәле түбәндәгесә: Ботвинниктең ун етенән 12,5 очкоһы, Смысловтың ун етенән — 9 (бер кисектерелгән партияһы), Решевскийҙең ун етенән—9, Керестең ун етенән 8,5 (бер кисектерелгән партияһы). Эйвенең ун һигеҙҙән 4 очкоһы бар.

Богдан Хмельницкий тыуған ерҙә

КИРОВОГРАД. (ТАСС). Өлкәнең общественносе сит илдәрҙең ҡоллоҡҡа төшөрөүселәренә ҡаршы һәм Польша шляхтаһына ҡаршы беренсе көрәштә Богдан Хмельницкий етәкселеге аҫтында Украина халҡының азатлыҡ өсөн көрәшенең башланыуына 300 йыл тулыу көнөн билдәләй.

Богдан Хмельницкийҙең тыуған ере — Чигиринда, шулай уҡ бороңғо Субботово ауылында, Медведовка, Сагуновка, Матвеевка, Ивановка һәм башҡа ауылдарҙа украин халҡының героик үткәне тураһында, уның туғандаш рус халҡы менән берләшеүе тураһында докладтар һәм беседалар үткәрелде.

Белоруссия колхоздары баҫыуҙарында

МИНСК. (ТАСС). Бөтә Белоруссияла булып үткән кеслә ямғырҙар сәсеүлектәргә бик яҡшы тәьҫир иттеләр. Бөтә урындарҙа ла бойҙай, арпа һәм һоло бик яҡшы булып сыға башланы. Көньяҡ райондарҙа ужым ашлыҡтары көлшәләнә. Баҫыусылыҡ бригадалары сәсеүлектәрҙе беренсе тапҡыр ҡый үләндәренән таҙарта башланылар.

Быйыл республика колхоздары сәсеүлек майҙандарын байтаҡ арттырасаҡтар. Бары тик бер Гомель өлкәһендә генә лә сәсеүлек майҙаны 50 мең гектарға киңәйтеләсәк.

Йәйге спорт сезоны асылды

Еңел атлеттар эстафетаһы

9 майҙа, фашистик Германияны Еңеү көнөнә арналған еңел атлеттар эстафетаһында Өфө ҡалаһының 74 физкультура командаһы ҡатнашты һәм был эстафета республикала йәйге спорт сезонын асыу менән билдәләнде.

Эстафетала ҡатнашыусы командалар 4 группаға бүленделәр. 1-се группаға — юғары уҡыу йорттары һәм физкультура техникумы командалары, 2-се группаға — мәктәптәр, техникумдар, производство коллективтәре, 3-сө группаға — ирҙәрҙән генә, һәм 4-се группаға — ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына торған командалар инделәр.

Ирҙәр — 1000, ҡатын-ҡыҙҙар 500 метрға, эстафетаның маршруты булған Карл Маркс, Пушкин, Цюрупа, Достоевский, Ленин, Сталин урамдары буйлап йүгерҙеләр. Эстафета 6 этаптан торҙо.

1-се группа буйынса беренсе урынды — физкультура техникумы, икенсе урынды —авиаинститут; 2-се группа буйынса беренсе урынды — кооператив техникумы, икенсе урынды — аҙыҡ техникумы, 3-сө группа буйынса беренсе урынды 9-сы номерле һөнәрселек училищеһе, 4-се группа буйынса кооператив техникум командалары алдылар.

Һүрәттә: Эстафетанан бер күренеш.

И. Нәжми тексы.
В. Жданов фотоһы.

Яҙғы кросс

9 майҙа, иртәнге сәғәт унда, Өфө ҡалаһының бөтә райондары физкультурниктәре массовый рәүештә профсоюз-комсомол кросын башлап ебәрҙеләр. Старт һәм финиш майҙандары, дистанциялар, бигерәк тә, Молотов районының физкультурниктәре йүгергән дистанция урыны — Якутов исемендәге баҡса матур биҙәлгән.

Иртәнге сәғәт 11-гә ҡаланың райондары буйынса кросҡа 1200 кеше ҡатнашҡайны инде. Молотов районының «Хеҙмәт резервтәре ДСО» коллективе ойошҡанлыҡ күрһәтте.

Кростың беренсе көнөнөң яҡшы һөҙөмтәне 1000 метрға йүгереүҙә ирҙәрҙән, тимер юл техникумы студенте Казанцев (1000 метрҙы 3 минут, 07 секундта үтте) һәм мединститут студенте Орлов (дистанцияны 3 минут 07 секундта үтте) күрһәтте.

500 метрға йүгереүҙә ҡатын-ҡыҙҙарҙан беренсе урынды мединститут студенткаһы иптәш Калинина алды. Ул дистанцияны 1 минут ... секундта үтте.

П. Т. Александров.

Шефка алынған райондарға ярҙам

Черниковск ҡалаһының промышленность предприятиелары үҙҙәре шефлыҡ иткән районлар һәм МТС-тарға быйыл ҙур ғына матди ярҙам күрһәттеләр. Хәҙер сәсеү ваҡытында колхозсыларҙы һәм МТС эшселәрен культуралы хеҙмәтләндереү өсөн ҙур әҙерлек алып баралар.

Машиналар төҙөү заводының Покровка районына кино установкаһы менән йыһазландырылған бер агитмашина, 50 кеше составында агитбригада, 3 докладсы ебәрелде. Шулай уҡ районға бер өсөн 300 китаптан торған библиотека әҙерләнде.

Нефть эшкәртеү заводы Иҙмәкәй районына ебәреү өсөн 200 китап әҙерләне, 2 докладсы билдәлөне, культбригада һәм агитмашина ойоштороу.

Дөйөм алғанда шефка алынған райондарға ебәреү өсөн ҡала буйынса бөтәһе 1000 китаптан торған 7 библиотека туплалды. Политик әҙерлекле .... доклады булсынды. 3 агитмашина ебәрелә, уларҙың икеһе күсмә киноустановка менән йыһазландырылған. 200 кешенән торған 4 культбригада ойоштороласаҡ. Агитбригадалар шефлыҡ итеүселәр һәм эшселәр .... самодеятельность .... ләндерәсәк.

Был культура көсө республикабыҙҙың Покровка, Иглин һәм Иҙмәкәй райондарын хеҙмәтләндерәсәк.

Инициативалы тимерсе

Тимерсе Григорий Крылов «Передовик» колхозының (Иглин районы) ауыл хужалығы инвентарҙарен, сәскес машиналарын яҡшы сифатлы итеп ремонтлауҙы ауыл Советы кулемендә беренсе булып тамамланы.

Баҫыу эштәре башланғас инвентарҙар һәм сәскес машиналары ватылғанда эшкә тотҡарлыҡ килтермәҫ өсөн .... мерсе эш барышында бик кәрәкле .... тимерсе инструменттарҙан һәм .... мастерской булдырҙы. Шулай ярҙамында ул бөтә ваҡ ремонттарҙы баҫыуҙа ....

МТС усадьбаһында кино-театр

Кушнаренко районы Шарип МТС-ы бынан өс йыл элек кино ойоштороуҙа ҡарамаҫтан, механизаторҙарҙы культуралы хеҙмәтләндереү буйынса МТС усадьбаһында байтаҡ эштәр эшләнде. Күптән түгел бында стационар кино-театр эшләй башланы. Был кино-театр 5 ауыл хужалығы артеле членарен йөрөйҙәр. Ошо көндәрҙә күрһәтелгән «Ант» фильмен колхозсылар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар.

Яңы машиналар

Ошо көндәрҙә Дәүләкән МТС-ы 8 яңы трактор, бинг тракторы һабан, күсмә мастерской һәм башҡа яңы машиналар алды. МТС-та .... автомашина ....

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Мәктәпте тамамлаусылар тураһында

1947 йылда юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү экзамендәре уҡытыу эшендәге байтаҡ етешһеҙлектәрҙе асты. Экзаменгә ингән йәштәрҙең байтағы, белем кимәлдәре етешмәү арҡаһында, вузға ҡабул ителмәне. Был айырым мәктәптәрҙең һәм мәғариф органдарының мәктәпте тамамлаусылар менән ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәренең фактыһы булып тора. Мәҫәлән, Шаран, Белорет районларында мәктәптәрҙе тамамлаусы кластар менән тейешенсә эшләмәнеләр, үтелгән материалды ҡабатлау уларҙа тик өсөнсө сиректә генә башланды. Был ҡабатлауҙы ауырайта, уның сифатын түбәнәйтә, билеттәрҙең айырым һорауҙарын ятлауға килтерә, уҡыусылар бөтә программа материалын аңлап өйрәнеүгә өлгәшә алмайҙар. Шаран районы Тумбағош ауылы мәктәбендә уҙғанды ҡабатлау уҡыусыларҙың тик үҙҙәренә генә тапшырылған, бында уҡытыусылар һөҙөмтәләү дәрестәре үткәрмәйҙәр, физика һәм химия буйынса лаборатория эштәре үткәрелмәй, сөнки дәрестәр күрһәтмә ҡулланмалар менән тәьмин ителмәгәндәр; биология һәм география буйынса экскурсиялар үткәрелмәй. Ә был саралар балаларҙың белемен нығытыуҙа бик ҙур роль уйнайҙар. Был етешһеҙлектәрҙе юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү комиссиялары уҙған йылда ла билдәләп үткәйнеләр инде.

Һәр бер мәктәп үҙен тамамлап сыҡҡан уҡыусыларҙың юғары уҡыу йорттарына инә алырлыҡ кимәлдә белемле булыуы тураһында уйларға, уларҙы уҡыуҙарын артабан үҫтереүгә әҙерләргә, дәресте өлгәшмәүселәр менән айырым эштәр алып барырға тейеш.

Ләкин уҡыу йылының беренсе яртыһында башҡарылған яҙма эштәргә ҡараһаң, бында уҡыусыларҙың белеме менән уҡытыусы тарафынан уға ҡуйылған баһа араһында бик ҙур айырма күренә. Бөтәһенә үк булмаһа ла, айырым эштәргә юғары баллдар ҡуйылған. Был мәктәп балаларының теле ярлы, культураһы түбән. Шаран районы Зирекле урта мәктәбенең 10-сы класс уҡыусылары бөтәһе лә яҙма эштән ҡәнәғәтләнмәҫлек билдәләре алдылар. Был хәл уҡыусыларҙың да, шулай уҡ уҡытыусыларҙың да дәресҡә таран әҙерләнмәүҙәрен күрһәтә. Тумбағош мәктәбендә уҡытыусылар мәктәпте тамамлаусылар алдына тейешле талаптарҙы ҡуймайҙар, ҡабатлау дәрестәрендә күрһәтмә пособиеләрҙе ҡулланмайҙар, өйгә бирелгән заданиеләрҙе уңышлы үтәүҙә балаларҙың яуаплылығын күтәреү өсөн көрәшмәйҙәр. Бында дәрестән өлгәшеү бик түбән. Класс журналдары бөрлө, икеле билдәләре менән сыбарланған. Бындай билдәләрҙең әһәмиәте лә юғалып бөткән инде, сөнки улар бик күп һәм дүртле баллдарын ҡуйғанда иҫәпкә алынмайҙар.

Уҙған материалды үҙләштереүҙә ҙур роль уйнарға тейеш булған кластан тыш эштәр ҙә был мәктәптәрҙә үткәрелмәй. Тарих, әҙәбиәт, математика фәндәре буйынса үҙған кластарҙа алынған белемде тулы бер системаға һалыуҙа булышлыҡ итеүсе тематик обзорҙар бында бик һирәк бирелә.

Республикабыҙҙың алдынғы мәктәптәре тамамлаусы кластар менән эшләүҙә байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Ләкин уларҙың эш тәжрибәләре файҙаланылмай. Мәҫәлән, Өфө ҡалаһы 3-сө мәктәбенең тәжрибәле уҡытыусыһы иптәш Мельникова уҡыу йылының беренсе көндәрендә үк 10-сы класта булған бер диктанттан һуң, грамотаһы етешмәгән һәр бер уҡыусыға айырым бүлектәр буйынса заданиелар бирә башланы һәм үҙенең ҙур әһәмиәтле эшен ҡыш буйынса дауам иттерҙе. Әҙәбиәтте ҡабатлау буйынса иптәш Мельникова 10-сы класта тематик кисәләр үткәрә. Кисәләрҙә күрһәтмә материалдар, портреттәр, картиналар күрһәтелә, музыкаль ариялар тыңланыла. Уҡыусыларҙың белемен күтәреүҙә улар бик ҙур ярҙам итә.

Өфөнөң 13-сө мәктәп уҡытыусыһы А. И. Макаров уҡыусылар менән физика материалын ҡабатлағанда тематик кинофильмдәрҙе файҙалана. Ә 9-сы мәктәп уҡытыусыларынан Хәйруллина һәм Рәжәпова иптәштәр тамамлаусы кластарҙа рус теле буйынса серьез эштәр үткәрәләр.

Өфө мәктәптәренең күбеһендә экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерлек тураһында ата-әсәләр йыйылыштары булды.

45-се мәктәп директоры иптәш Миронова тамамлаусы кластарҙы үҙ контроленә алды. Ул балаларҙың экзамендәргә әҙерләнеү сифатын, уларҙың дәресҡә йөрөшөн тикшерә. Урта мәктәпте тамамлаусыларға профессия һайлап алыуҙа ярҙам итеү маҡсатында стахановсылар, ғалимдәр һәм искусство работниктәре менән осрашыу кисәләре үткәреләсәк.

Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнеүҙә булған был файҙалы башланғыстар бөтә мәктәптәр тарафынан күтәрелеп алынырға тейеш. Уҡыу йылының был иң мөһим һәм яуаплы осорон үҙ ағышына тапшырырға ярамай. Мәктәпте тамамлап сығыусыларҙы экзамендәргә уңышлы әҙерләүгә бөтә общественность күтәрелергә тейеш.

Е. Заруди.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-46, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00744. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14500

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 94
12
май
шаршамбы

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Көнсығыш райондары нефть промышленносе работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1—2-се биттәр).

Баҫыу эштәренең бөтә төрҙәре буйынса көндәлек нормаларҙы үтәргә һәм арттырып үтәргә! (1-се бит).

Башҡортостан нефтселәре! Бөйөк наградаға яуап итеп, Тыуған илебеҙгә тағы ла күберәк нефть һәм нефть продукттары бирәйек! В. Попов.—Фиҙакәр хеҙмәт менән яулап алынған дан. Юғары награда — яңы хеҙмәт батырлыҡтарына рухландыра. (2-се бит).

С. Бикбов. — Башҡортостан нефть промышленносенең тағы ла ҙурыраҡ уңыштары өсөн. (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Федотов. — Конференциянан һуң. (3-сө бит).

БИШ ЙЫЛЛЫҠТЫ — ДҮРТ ЙЫЛДА! Май алды ярышындағы уңыштарҙы нығытырға һәм күбәйтергә. (3-сө бит).

Ҡадир Даян. — Ҡандра күл ауылында. (3-сө бит).

Әҙерләнгән ағастарҙы яңы биш йыллыҡ төҙелештәренә тиҙерәк илтеп еткерергә. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Яҙғы сәсеүҙә ауыл Советтәренең ойошторо-массовый эштәрен көсәйтергә

Ауыл эшсәндәре баҫыуҙарға юғары урожай өсөн көрәшкә сыҡтылар. Улар хәҙер государство өсөн, бөтә халыҡ өсөн иң әһәмиәтле булған бурысты хәл итәләр. Сөнки юғары урожайҙың яҙмышы, бөтәһенән элек, яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүгә бәйләнгән.

Быйыл яҙҙың һуңлап килеүе баҫыу эштәрен ваҡытында массовый рәүештә башлауға байтаҡ ук тотҡарлыҡ яһаны. Шунлыҡтан хәҙер бөтә көстө сәсеү эштәрен тиҙләтеүгә туплау талап ителә. Күп һанда депутаттары һәм активе булған ауыл Советтәре үҙҙәренең бөтә ойоштороу һәм массовый эштәрен яҙғы сәсеүҙең темпын күтәреүгә йүнәлтеү юлы менән колхоздарға ғәйәт ҙур ярҙам күрһәтә алалар. Быны Туймазы районының Илсембәт ауыл Советы (председателе иптәш Хисмәтуллин) эше миҫалында бик асыҡ күреп була. Бында ауыл Советының бөтә депутаттары яҙғы сәсеү эшенең иң яуаплы участкаларына беркетелгән. Ауыл Советы ваҡытында колхоздарға ярҙам күрһәтеп, яҙғы баҫыу эштәрен тулы әҙерлек менән ҡаршылауҙы тәьмин итте һәм ҡар иреп бөтеү менән бөтә көстө яҙғы сәсеү эшенә тупланы. Шул арҡала ундағы «Кооператив № 3» колхозы дүрт көн эсендә 136 гектар ашлыҡ сәсте, 120 гектар ер һөрҙө.

Баҫыу эштәренең юғары темпы өсөн көрәш — сифат өсөн көрәш менән бик тығыҙ рәүештә бәйләп алып барылырға тейеш. Тик яҡшы итеп эшкәртелгән тупраҡҡа, агротехника ҡағиҙәләрен ныҡ еренә еткереп, теҙмә сәскестәр менән сәскәндә генә юғары урожай алыуға өлгәшергә мөмкин. Шуның өсөн район һәм ауыл Советтәренең даими хәрәкәт итеүсе ауыл хужалығы комиссиялары агрономдар һәм агротехниктәр менән берлектә яҙғы баҫыу эштәренең юғары сифатлы итеп үтәлеүе өсөн көрәш алып барырға тейештәр.

Ҡыйғы районы Пыланды ауыл Советының бөтәһе 19 депутатынан уныһы туранан-тура колхоз производствоһында эшләй. Ауылдың төрлө учреждениеларендә хеҙмәт иткән 9 депутат баҫыу станларында колхозсылар араһында агитацион-массовый һәм ойоштороу эштәре алып баралар. Ауыл Советы был депутаттарға баҫыу эштәренең сифатын күҙәтеп барыу бурысын йөкмәткән. Яҙғы сәсеүгә әҙерлек һәм уны ойошҡан рәүештә үткәреү мәсьәләһе ауыл Советының сессияһында өс тапҡыр ҡаралған һәм һуңғы сессияла яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәреүгә йүнәлдерелгән саралар билдәләнеп, һәр бер депутат конкрет эш тармағына беркетелгән. Был эштәр менән ауыл хужалығы комиссияһының председателе депутат иптәш Кирхәнов етәкселек итә. Бөтә ауыл хужалығы машиналарына ремонтты ваҡытында үткәреүҙе тәьмин иткән депутат иптәш Закиров хәҙер баҫыуҙарҙа ағымдағы ремонт эштәрен башҡара. Ауыл Советы (председателе иптәш Ғәлиуллин) депутаттарҙы һәм бөтә ауыл активен яҙғы сәсеү эштәрен алғәлә үтәү өсөн көрәшкә ойоштора белеүе арҡаһында бындағы Киров, Сталин исемендәге колхоздарҙың, шулай уҡ «Ирк», «Яуын» колхоздарының бөтәһендә лә колхозсылар баҫыуға ойошҡан рәүештә сыҡтылар. Киров исемендәге колхоз районда беренсе булып эш башланы һәм юғары сифатлы итеп 170 гектар ашлыҡ сәсте. Тәүге партия ойошмаларының агитацион-массовый эштәре һәм ауыл Советының бөтә культура-ағартыу эштәре социалистик ярышты киң йәйелдереү маҡсатына дөрөҫ йүнәлдерелгән булыуы арҡаһында баҫыу эштәренең графиге арттырып үтәлә.

Ләкин, быйыл республикабыҙҙың бөтә районтарында ла ҡарҙың бер тигеҙ иреп бөтөүенә ҡарамаҫтан, Ҡалтасы, Краснокама, Белокатай, Әбйәлил, Учалы, Бишбүләк һәм башҡа райондарҙа яҙғы сәсеү эшенә бик аҡрын ҡуҙғалалар. Сәсеү эшенең бер генә сәғәткә, бер генә көнгә булһа ла һуңлауы урожайҙы түбәнәйтеүгә алып барғанлығын онотолар. Ә район һәм ауыл Советтәренең етәкселәре колхоздарҙағы ҡуҙғала алмаусылыҡҡа килешеп ҡарайҙар.

Урындағы совет органдары яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн колхоздарҙың бөтә резервтарын, бөтә көстәрен мобилизовать итеүҙә колхоз етәкселәренә көндәлек ярҙам күрһәтергә тейештәр. Хәҙер бөтә урында ла иртә культураларҙы сәсеү эшен массовый рәүештә йәйелдерергә, бының өсөн тракторҙарҙы тулы ҡеүәттә эшләтергә, аттарҙан һәм башҡа эш малдарынан дөрөҫ файҙаланырға, баҫыуҙа ҡуна ятып эшләүҙе ойоштороу юлы менән хеҙмәт етештереүсәнлеген бөтә яҡлап күтәрергә кәрәк.

Ауыл Советтәренең депутаттары һәм ауыл активе социалистик баҫыуҙарҙа — һабанда һәм тырмала, сәсеүҙә һәм ужымдарҙы өҫтәмә азыҡландырыуҙа үҙҙәренең шәхси эш өлгөләре менән, шулай уҡ ойоштороу һәм культура-ағартыу эштәре алып барыу юлы менән бөтә колхозсыларҙың да яҙғы сәсеү эшендә актив ҡатнашыуҙарын тәьмин итергә бурыслылар.

Яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән алып, колхоздарға, бригадаларға, звеноларға һәм башҡа эш участкаларына беркетелгән депутаттар һәм ауыл активе аша баҫыу эштәре графигенең аныҡ үтәлеүен, һәр бер колхозсының минимум хеҙмәт көнен һис бер һүҙһеҙ эшләүен тәьмин итеү ауыл Советтәренең иң мөһим бурысы булып тора. Хәҙер ауыл Советтәре сессияларының, ултырыштарының, бөтә даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың эшмәкәрлеге, һәр бер депутаттың, һәр бер активтың көсө һәм һәләтлеге яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта юғары сифатлы итеп үтәүгә йүнәлдерелгән булырға тейеш.

Көнсығыш райондары нефть промышленносе работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

Нефть сығарыуҙы һәм нефть продукттары етештереүҙе арттырыу буйынса хөкүмәт заданиеларен уңышлы үтәгәндәре, 1946 һәм 1947 йылдарҙа государство планын үтәгәндәре өсөн наградларға:

Ленин ордене менән

1. Егор Николаевич **Абазовты** — «Дальнефть» берекмәһе «Эхаби» промыселының өлкән операторы.
2. Евгений Михайлович **Абрамовты** — «Центроспецстрой» тресының слесаре.
3. Александр Петрович **Агишевте** — «Дальнефть» берекмәһенең баш инженеры.
4. Михаил Семенович **Алиханде** — Коньяк-Камск машиналар төҙөү заводының мастеры.
5. Филипп Андреевич **Алексеевте** — «Туймазынефть» тресы 1-се номерлы бораулау конторақының бораулау мастеры.
6. Дмитрий Гаврилович **Андроновты** — «Дальнефть» берекмәһенең вышка төҙөүселәр бригадиры.
7. Сурен Акопович **Арзумановты** — Министерство «Главнефтемашынлаҡ» баш инженеры.
8. Мирза Мосеевич **Багировты** — «Калининнефть» тресының бораулау мастеры.
9. Павел Прокопьевич **Балабановты** — «Туймазынефть» тресының бораулау мастеры.
10. Николай Анатольевич **Бандинде** — «Главнефтегазстройҙың» 7-се номерлы тресы электросварщигы.
11. Константин Алексеевич **Байракты** — «Башнефть» берекмәһенең баш инженеры.
12. Михаил Михайлович **Башиловты** — «Главнефтегазстройҙың» 21-се номерлы тресы управляющийы.
13. Иван Федорович **Бескровныйҙы** — 441-се номерлы заводтың цех начальнигы.

(Дауамы 2-се биттә).

Баҫыу эштәренең бөтә төрҙәре буйынса көндәлек нормаларҙы үтәргә һәм арттырып үтәргә!

ИРТӘ КУЛЬТУРАЛАР СӘСЕҮ ТАМАМЛАНДЫ

ЯНАУЫЛ. (Телефон аша). Буденный исемендәге колхоз иртә культуралар сәсеүҙе районда беренсе булып тамамланы. 8 көн эсендә бөтәһе 246 гектар бойҙай, һоло һәм борсаҡ культуралары сәселде, шулай уҡ 80 гектар ужым тырматылды.

Һабансыларҙан Нурлығаянов һәм Шәйхетдинов иптәштәр көн һайын 1,30 гектар ер һөрөп, эш нормаларын 135—140 процентҡа үтәйҙәр. Һөрөү менән тырматыу араһында өҙөклеккә юл ҡуйылмай. Тырмасыларҙан Нуретдинов һәм Әхмәтов иптәштәр, үгеҙҙәр менән эшләп, көндәлек нормаларын 150 процентҡа үтәйҙәр. Иртә культуралар сәсеүҙе беренсе булып тамамлаусы иптәш Шәрипов бригадаһына колхоздың күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. Колхозсылар 15 майға сәсеүҙе тулыһынса тамамлау өсөн көрәшәләр.

М. Фәтихов.

Бер көндә 211 гектар

БАЙМАҠ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозында баҫыу эштәре уңышлы бара. Бында бер мең гектарҙан артыҡ ер һөрөлдө һәм ике мең гектарҙан артыҡ майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәселде.

Баҫыу эштәренә башлауҙың тәүге көндәренән үк яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн бүлексәләр, бригадалар һәм звенолар араһында ярыш ойошторолдо. «Октябрь» бүлексәһендә Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш В. С. Солопин етәкселек иткән звено алдынғылыҡты үҙендә һаҡлай. Тракторсыларҙан ике бер туған Григорий һәм Иван Носков иптәштәр 7 майҙа айырыуса ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Улар бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем эшләп, 120 гектар урынына, 211 гектар ашлыҡ сәстеләр. Тракторҙарға заправка буразнала яһала, сәскестәргә орлоҡ машиналарҙы туҡтатмайынса эш барышында һалына. 4 ат менән баҫыуға өҙлөкһеҙ рәүештә орлоҡ, яғыулыҡ һәм һыу ташылып тора.

И. Зарипов.

Өфө районының «Завет Ильича» колхозы быйыл сәсеү майҙанын бойҙай һәм һоло культуралары иҫәбенә 400 гектарға арттыра.
Һүрәттә: һулда, Моторный МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры П. С. Рулев һәм «Завет Ильича» колхозының полеводы Н. Я. Разбежкин иптәштәр һөрөүҙең тәрәнлеген тикшерәләр.
Л. Якубов фотоһы.

Дыуанда тракторҙар файҙаланылмай

ДЫУАН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район МТС-тарында быйыл трактор эштәренең байтаҡ артыуы эште айырыуса яҡшы ойошҡанлыҡ менән алып барыуҙы, машиналарҙы дөрөҫ һәм тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙы талап итә.

Ләкин баҫыу эштәренең тәүге көндәре үк МТС-тарҙың үҙ алдарына ҡуйылған бурыстарҙы үтәүгә бик насар әҙерләнгәнлектәрен һәм колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәүгә сиктән тыш яуапһыҙ ҡарағанлыҡтарын күрһәтте. МТС етәкселәрендә лә, шулай уҡ күпселек тракторсыларҙа ла әле булһа «ер дымлылыҡҡа» һылтаныу дауам итә. «Новая жизнь» колхозы баҫыуҙарында күптән үк инде һөрөргә, сәсергә тулы мөмкинлектәр бар. Ә Маҫағут МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры Александр Пичугин 10 көн буйына ике трактор менән ни бары ике гектар ер һөрҙө.

Дыуан МТС-ында ла 34 тракторҙың бары тик 28-е генә файҙаланыла. «Ҡыҙыл партизан», «Ударсы» колхоздарында тракторҙар баҫыуға сығыу менән үк ватылдылар. «Урал» колхозында иптәш Себилов етәкселек иткән трактор бригадаһы бары тик 6 майҙа ғына баҫыуға сыҡты һәм уның әле лә эшкә башлағаны юҡ. МТС директоры иптәш Долгополов был фактыларҙың бөтәһенә лә килешеп ҡарай, тракторҙарҙы эшкә ҡушыу сараһын күрмәй. Һөҙөмтәлә трактор эштәренең графиге биш көндән биш көнгә өҙөлөп килә. Һуңғы биш көнлектә һәр бер тракторға ни бары берәр гектар ер һөрөлдө.

Ярослав МТС-ында ла яҙғы сәсеү ғәфү ителмәҫлек аҡрын бара. Бында ни бары 65 гектар ер һөрөлгән. МТС һәм колхоз етәкселәре баҫыу эштәрен һуңлатыуҙың бик күп урожайҙы юғалтыуға килтерәсәген аңларға теләмәйҙәр.

Иртә культураларҙы сәсеү өсөн иң ҡиммәтле ваҡыт үтә, ләкин Дыуан районы МТС-тарында ашыҡмайҙар, трактор бригадаларының эштәре ойошторолмай. Район етәкселәре лә бик тыныс йәшәйҙәр, улар МТС-тарҙың эштәре менән аҙ ҡыҙыҡһыналар.

КҮП ЙЫЛЛЫҠ ҮЛӘН СӘСМӘЙҘӘР

МӘЛӘҮЕЗ. (Телефон аша, махсус хәбәрсебеҙҙән). «Пятилетка» колхозы председателе иптәш Русаков күп йыллыҡ үлән сәсеү планының үтәлмәү сәбәбен быға тиклем орлоҡ булмауы менән аңлатып килде. Хәҙер был һылтауға урын ҡалманы. Государство фондынан үлән орлоҡтары алыу өсөн махсус кредиттар ебәрелде. Шунан һуң иптәш Русаков башҡа һылтаныуҙарға күсте: имеш, үлән сәсәм, тип бурысҡа инеп булмай инде...

Районда үлән сәсеү эшенә был тиклем яуапһыҙ ҡараш ниңгыҙ бер Русаков өсөн генә характерле түгел. Колхоздарҙа ундай етәкселәр байтаҡ. Ул ғына ла түгел, район етәкселәре үҙҙәре лә күп йыллыҡ үлән сәсеү эшенә тейешле әһәмиәт бирмәйҙәр. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Безвуктәж быйыл күпме майҙанда үлән сәселергә тейешлеген һорағас, ул бындай пландың булыуын асыҡ белмәне. Бөтөнләй дөрөҫ булмаған һандарҙы күрһәтте. Фактик рәүештә эш былай тора. Районда быйыл бөтәһе 3500 гектар күп йыллыҡ үлән, шуның 2900 гектары һоло һәм арпа культуралары менән бергә сәселергә тейеш.

Хәҙер районда яҙғы сәсеү эштәре йәйелә. 8 майға тиклем 1000 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде. Ләкин әле бер генә гектар ҙа үлән сәселмәне.

Район күп йыллыҡ үлән орлоғо менән ни бары 33 процентҡа генә тәьмин ителгән. Шул иҫәптә Стәрлетамаҡ ҡалаһынан барып алынырға тейешле булған 50 центнер костер орлоғо ла юҡ. Ләкин күп колхоздар бирелгән орлоҡто барып алмайҙар. Мәҫәлән, «Яңы юл» колхозы әлегә тиклем 2 центнер костер һәм 50 килограмм люцерна, «Ҡыҙыл яр» колхозы 4 центнер костер һәм 50 килограмм люцерна орлоғон алмаған.

Мәләүез районы һәм колхоздары етәкселәренә культуралы игенселектең, тотороҡло һәм юғары урожайҙың нигеҙе булған күп йыллыҡ үлән сәсеү эше менән большевиктарса шөғөлләнергә күптән ваҡыт инде. Быйылғы планды һис һүҙһеҙ тулыһынса үтәү өсөн ашығыс саралар күрелергә тейеш.

Б. Сафин.

Тәүге етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөргә

Әлшәй районында яҙғы баҫыу эштәре бөтә райондарға ҡарағанда ла иртәрәк башланды. Майҙың тәүге көндәрендә республиканың күпселек райондарында ужымдарҙы тырматыу эше генә алып барылғанда, Әлшәй районы колхоздары ер һөрҙөләр һәм ашлыҡ сәстеләр.

Яҙғы сәсеүҙе районда беренсе булып иң эре колхоздарҙан «Правда» колхозы башланы. Унда майҙың беренсе биш көнлөгөндә баҫыуҙа 150-нән артыҡ ат, ундарса колхозсы, 3 трактор эшләй ине инде. Сталинса яңы биш йыллыҡтың өсөнсө яҙы алдында торған ҙур бурыстарҙы үтәү өсөн көрәш рухы менән һуғарылған колхозсылар сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн тырыш хеҙмәт күрһәтәләр.

Мария Матвеева етәкселек иткән бригадала колхозсыларҙың күбеһе беренсе биш көнлөктөң ахырына эш нормаларын арттырып үтәй башланылар. Сәсеүсе Николай Иванов, Зинит Данилов һәм башҡалар 9 рәтле сәскестә эшләп, сменаға 4,5—5-әр гектар ашлыҡ сәсәләр. Тракторист Вали Сәхәбетдинов сменаға 15-әр гектар сәсә. Бындай миҫалдар аҙ түгел.

Ләкин, ғөмүмән алғанда, «Правда» колхозында һәм унда ғына ла түгел, бөтә Әлшәй районында яҙғы сәсеүҙең темпы үткән йылғынан бик түбән әле. Бының сәбәбе шунда: колхоз етәкселәре «еңеллек» настроениеһенә бирелеп, төп көстәрҙе эшкә тиҙерәк ҡушыуҙы тәьмин итмәгәндәр, сәсеүҙең тәүге көндәренән үк бөтә колхозсыларҙың да нормаларҙы үтәүҙәренә өлгәшмәгәндәр. Баҫыуҙа колхозсылар араһында политик-массовый эш йомшаҡ ҡуйылған. Тракторҙарҙан тулыһынса файҙаланыу өсөн көрәш юҡ.

Фактыларға туҡталайыҡ. «Правда» колхозының икенсе бригадаһында бер үк участкала ер һөрәләр һәм ашлыҡ сәсәләр.

— Эш аҡрын бара әле, — тип зарлана бригадир иптәш Тәхбәтуллин. Ул бының сәбәптәрен дә белә, ләкин эште тейешенсә көйләп ебәрмәй.

— Үрләсле ерҙә аттарға ауыр, — тип колхозсылар ике атлы һабанға дүртәр ат еккәндәр. Эш һуң башлана, иртә туҡтай. Һөрөүҙең тәрәнлеге 14—15 сантиметрҙан артмай, ер баштарында орлоҡ күмелмәй ҡала. Яҙ һөрөлгән ерҙе тырмасылар бер эҙҙән генә тырматалар. Сәсеү нормаһы (бойҙай сәсеүҙә) һәр гектарға 20-шәр килограмм кәм ҡуйылған. Эш нормаһы күбеһенсә үтәлеп еткерелмәй. Ошо хәлде колхоз председателе иптәш Ғәббәсов та, партия ойошмаһы секретары иптәш Шәйморатов та беләләр, ләкин бригадала көстәренең рациональ файҙаланылмауына һәм агротехниканың ҡуралтә боҙолоуына килешеп ҡарайҙар.

Колхоздың башҡа бригадаларында ла эш шул төҫлө тора. Ҡайһы ғына бригадаға барма, унда эш көстәренең етерлек булмауынан зарланалар, ә күп кенә колхозсылар үҙҙәренең шәхси баҡсаларында йәшелсә ултыртыу менән шөғөлләнәләр.

Колхозда 212 баш эш аты, 24 үгеҙ, 3 трактор. Был көс колхозға бирелгән биш көнлөк заданиеларҙе үтәргә генә түгел, хатта арттырып үтәргә лә етерлек. Шуға ҡарамаҫтан, колхоз майҙың беренсе биш көнлөгөндә яҙғы сәсеү эштәре графигын ярты ғына үтәне.

Колхоздың партия ойошмаһында 16 партия члены, 6 кандидат иҫәпләнә. Былардан тыш, ошо уҡ ауылда бик ҙур территориаль партия ойошмаһы бар. Унда 11 коммунист. Шуға ҡарамаҫтан, колхозсылар араһында политик-массовый эш бик йомшаҡ ҡуйылған. Дөрөҫ, кис менән колхоздың библиотекаһында ҡайһы бер коммунистар (Солтанов, Эюпова, Валиев, Шәйморатов иптәштәр) «боевой листоктар» сығарыу, иртәгә үткәрәсәк бесәдәләргә әҙерләнеү менән шөғөлләнәләр. Ләкин башҡа коммунистар политик эш алып барыуға формаль рәүештә генә ҡарап ителгәндәр. Партия ойошмаһы сәсеүҙә социалистик ярыштың ысын-ысындан ойошторолоуы һәм киң йәйелдерелеүе өсөн көрәшмәй.

Райондың бер нисә алдынғы колхозында (мәҫәлән, «Ленинская победа», «Дим», Калинин исемендәге колхоздарҙа) сәсеү бер ни тиклем ҡыҙыуыраҡ бара. Ләкин улар ҙа тейешле темпты ала алмағандар. «Ҡыҙыл юл», «Игенсе», «Һабансы», Папанин исемендәге колхоздарҙа баҫыу эштәре бигерәк тә аҡрын. Уларҙа инде сәсеүҙең айҙан да артыҡ дауам итеү ҡурҡынысы килеп тыуған.

Үкенескә ҡаршы, район ойошмаларында сәсеү менән хәлдең шулай насар булыуына бер төрлө лә тревога һиҙелмәй. Улар баҫыу эштәренә һаман элеккесә йомшаҡ етәкселек итәләр.

Беҙ Аксен МТС-ында булдыҡ. Был МТС-тың 45 тракторынан тик 35-е генә эшләй. Улар ҙа эш нормаларын ярты-йорто ғына үтәйҙәр. Тракторҙарҙы төндә эшләтеү ойошторолмаған ғына түгел, бәлки ҡайһы бер трактористар тарафынан төнгө сменаларҙа үтәлгән эшкә учет та ҡуйылмаған. Ташлы МТС-ында ла эш шулай уҡ. Бында тракторҙарға техник тәрбиә һәм бригадаларҙың эшенә оператив етәкселек юҡ дәрәжәһендә.

Шуныһы ғәжәп, эштәрҙең насар барыуына ҡарамаҫтан, МТС-тарҙың яуаплы работниктәре (мәҫәлән, Аксен МТС-ының өлкән агрономы Харламов, Ташлы МТС-ының өлкән агрономы Тимонин, өлкән механигы Макаров һәм башҡалар) бригадаларға сығып эште рәткә һалаһы урынына, һәр төрлө сәбәптәр табып канцелярияла ултырырға, үҙҙәрен төрлө ҡағыҙҙарға күмергә яраталар.

Беҙ район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы иптәш Леонтьевты лә баҫыуҙа түгел, кабинеттә, телефон янында осраттыҡ. Ул да телефон аша «етәкселек» итә. Ә колхоздарҙа агротехник контролде көсәйтеүгә бик аҙ иғтибар бирә.

Районда 85 колхоз. Агрономдар 27. Өҫтәүенә ауыл хужалығы институтының һуңғы курсынан 6 студент (иртәгә буласаҡ агрономдар) эшләй. Тимәк баҫыу эштәренә агротехник контролде бик яҡшы ойошторорға мөмкин. Ләкин агрономдар күп кенә колхоздарҙа агротехниканы боҙоуҙарҙы ситләтеп үтәләр, брак яһаусыларға ҡарата сара күреүҙе үҙҙәренең төп эше итеп ҡарамайҙар.

Әлшәй районы майҙың беренсе биш көнөндә бөтәһе 6000 гектар ер һөрөргә, 7,5 мең гектар ашлыҡ сәсергә тейеш ине. Был графиктың өстән бер өлөшө самаһы ғына үтәлде.

Сәсеүҙең иң яҡшы сроктары сығып бара. Ә алда эшләйһе эш бик күп әле. Быға шуға күрә район ойошмалары сәсеүҙе һәр бер колхозда көсәйтеү өсөн, уның сифатын яҡшыртыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр.

Х. Рафиков.

Көнсығыш райондары нефть промышленносе работниктәрен ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советө Президиумы

УКАЗЫ

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

14. Сәрүәр Шайбәк улы **Бикбовты** — ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете секретаре урынбаҫары.

15. Григорий Игнатьевич **Болдыревте** — Көнсығыш райондары нефть промышленносе министренең урынбаҫары.

16. Леонид Владимирович **Борисовты** — «Главнефтегазстройҙың» 1-се номерле тресы баш инженере.

17. Василий Яковлевич **Бузулковты** — «Востоконефтепроводстрой» тресы эшендә өлкән етештереүсе.

18. Сабир Әхмәтйән улы **Ваһаповты** — ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете секретаре.

19. Горяй Шәрип улы **Вәлиевте** — «Главнефтегазстройҙың» 1-се номерле тресы плотнигы.

20. Егор Васильевич **Варенөвты** — «Туймазынефть» тресы 2-се номерле промыселдең нефть сығарыу мастере.

21. Николай Пантелеевич **Вовканы** — «Нефтезаводмонтаж» тресының электросварщигы.

22. Николай Лаврентьевич **Вовченконы** — «Башнефтезаводтар» берекмәһенең начальнигы.

23. Павел Петрович **Галонскийҙе** — «Туймазынефть» тресының баш инженере.

24. Иван Иванович **Полодовты** — «Куйбышевнефть» берекмәһенең начальнигы.

25. Василий Лаврентьевич **Денисовты** — Саратов Геолбуртресы Ҡазанлы нефтеразведкаһының бораулаусыһы.

26. Михаил Андрианович **Евсеенконы** — Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министре.

27. Борис Михайлович **Ежовты** — Өфө нефть эшкәртеү заводының цех начальнигы.

28. Тимофей Григорьевич **Ежовты** — «Дальнефть» берекмәһе Охинский промыселенең өлкән мастере.

29. Татаркан Магометович **Золоевты** — «Туймазынефть» тресының баш геологы.

30. Иван Петрович **Зубовты** — «Калининнефть» тресының баш геологы.

31. Петр Александрович **Ильинде** — Министерство «Главнефтепереработкаһың» баш инженере.

32. Яков Иванович **Инжеваткинде** — «Кинельнефть» тресы бораулау конторҙаһының бораулау мастере.

33. Вартан Александрович **Каламкаровты** — Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министренең урынбаҫары.

34. Шуакали **Карамендеевте** — «Казахстаннефть» берекмәһе «Ҡошҡар» промыселенең бораулау мастере.

35. Авах Вагапович **Карамяндө** — Киров исемендәге Саратов крекинг заводының директоры.

36. Павел Кондратьевич **Кизятовты** — «Ставропольнефть» тресы бораулау конторҙаһының бораулаусыһы.

37. Николай Архипович **Киселевте** — «Куйбышевнефтеразведка» тресының бораулау мастере.

38. Иван Леонтьевич **Климовты** — Кунгур машиналар төҙөү заводының директоры.

39. Михаил Яковлевич **Кропочевте** — «Краснокамскнефть» тресының бораулау мастере.

40. Василий Иванович **Кулявинде** — «Куйбышевнефтеразведка» тресының управляющие.

41. Федор Павлович **Лейсашевте** — Ванковск нефть эшкәртеү заводының директоры.

42. Григорий Михайлович **Лисичкинде** — «Туймазыэлектроток» конторҙаһының цех начальнигы.

43. Николай Гиоргиевич **Литвиновты** — Хабаровски нефть эшкәртеү заводының директоры.

44. Яков Алексеевич **Лугинде** — «Сахалиннефтестрой» тресының монтажниктәр бригадиры.

45. Михаил Васильевич **Мальцевте** — «Туймазынефть» тресының бүлек начальнигы.

46. Василий Иванович **Маркеловты** — Орск нефть эшкәртеү заводының операторы.

47. Михаил Васильевич **Мельниковты** — 228-се номерле заводтың директоры.

48. Минас Иванович **Минасянде** — ВКП(б) Үҙәк Комитетенең Өфө нефть эшкәртеү заводындағы парторгы.

49. Михаил Федорович **Мирчинканы** — Министерствоның Главнефтегеология начальнигы.

50. Виктор Иванович **Муровленконы** — «Ставропольнефть» тресының управляющие.

51. Николай Сидорович **Никитенконы** — «Дальнефть» берекмәһе «Эхаби» промыселенең директоры.

52. Николай Николаевич **Никоденконы** — «Центроспецстрой» тресының плотник-столяре.

53. Иван Парфирьевич **Нифантовты** — «Туймазынефть» тресының управляющие.

54. Иван Романович **Осадченконы** — Өфө нефть эшкәртеү заводының директоры.

55. Владимир Лукьянович **Пилипецте** — 54-се номерле трестың управляющие.

56. Иван Павлович **Полянинтовты** — «Главнефтегазстройҙың» Куйбышев территориаль төҙөлеш управлениеһенең электросварщигы.

57. Владимир Григорьевич **Поповты** — Сызрань нефть эшкәртеү заводының директоры.

58. Михаил Алексеевич **Потюкаевты** — «Туймазынефть» тресы 1-се номерле бораулау конторҙаһының директоры.

59. Валентин Тимофеевич **Пчелинцевте** — «Куйбышевнефть» берекмәһенең баш инженеры.

60. Александр Михайлович **Пузановты** — ВКП(б)-ның Куйбышев Өлкә Комитете секретаре.

61. Александр Иванович **Родионовты** — «Верхне Сергинск машиналар төҙөү заводының директоры.

62. Василий Назарович **Синковты** — «Центроспецстрой» тресының сварщигы.

63. Николай Иванович **Сорокинде** — «Нефтезаводстрой» тресының управляющие.

64. Алексей Маркович **Старковты** — «Башнефтезаводстрой» тресының управляющие.

65. Михаил Васильевич **Сидоренконы** — Министерствоның главнефтесбыта начальнигы.

66. Николай Степанович **Тимофеевте** — Министерствоның техник управлениеһе начальнигы.

67. Григорий Иванович **Толчинге** — Өфө нефть эшкәртеү заводының цех мастеры.

68. Иван Михайлович **Тороповты** — Министерствоның Баш тауар-транспорт управлениеһе начальнигы.

69. Андрей Алексеевич **Трофимукты** — «Башнефть» берекмәһенең баш геологы.

70. Иван Александрович **Траншицте** — «Нефтезаводмонтаж» тресының баш механигы.

71. Яков Ильич **Фигинде** — 228-се номерле заводтың баш инженеры.

72. Виктор Николаевич **Федоровты** — «Казахстаннефть» берекмәһенең начальнигы.

73. Павел Михайлович **Федоровты** — 223-се номерле заводтың баш инженеры.

74. Хол **Хамзаевты** — «Калининнефть» тресының «Чукур-Ляпгар» нефтеразведкаһының мастеры.

75. Әкбәр **Хамдамовты** — «Калининнефть» тресының баш инженеры.

76. Гариф Хәмидулла улы **Хәмидуллинде** — Шөгөр нефть промыселенең бораулау мастере.

77. Разия Садиҡ ҡыҙы **Шафиковаһы** — «Туймазынефть» тресы 1-се номерле промыселдең нефть сығарыу операторы.

78. Алексей Тихонович **Шмаревты** — «Башнефть» берекмәһе начальнигенең урынбаҫары.

(ТАСС).

(Дауамы бар).

Башҡортостан нефтселәре! Бөйөк наградаға яуап итеп, Тыуған илебеҙгә тағы ла күберәк нефть һәм нефть продуктылары бирәйек!

Фидакәр хеҙмәт менән яулап алған дан

Өфө нефть эшкәртеү заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре заводты Ленин ордене менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указын ҙур шатлыҡ менән ҡаршыланылар. Көндөҙгө сменанан һуң нефть эшкәртеүселәр митингыла йыйналдылар. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең заводтағы парторгы иптәш Минасян митингыны асып, иптәш Осадченкоға һүҙ бирә.

— Большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте, — тине үҙенең сығышында завод директоры иптәш Осадченко, — беҙҙең хеҙмәтебеҙҙе юғары баһаланы. Был юғары баһаны, коллектив үҙенең фидакәр хеҙмәте менән яулап алды. Беҙ, килеп тыуған ҡыйыншылыҡтар алдында аптырап ҡалмаһыҡ, ә киреһенсә, уларҙы еңеп, алға ос барҙыҡ. Һуңғы биш йыл эсендә беҙ тағы коллектив заводтың ҡеүәтен һәм нефть эшкәртеүҙе ике тапҡырҙан да күберәк арттырҙыҡ. Һуңғы ике йыл эсендә завод илебеҙгә планнан тыш утыҙ өс миллион һумлыҡ артыҡ экономия бирҙе. Был уңыштар беҙҙең биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереү нәтижәһендә ирешелде. Хөкүмәтебеҙҙең юғары наградаһына тағы ла яҡшыраҡ һәм стахановсаларса эшләү менән яуап бирергә тейешбеҙ. Коллектив алдында производство процестарын механизациялаштырыу, продукцияның сифатын яҡшыртыу буйынса күп кенә бурыстар тора. Беҙ уларҙы уңышлы хәл итәсәкбеҙ. Партия һәм хөкүмәтебеҙҙең бөйөк ышанысын аҡлау өсөн беҙ, нефть эшкәртеүселәр, биш йыллыҡ планды дүрт йылда намыҫлы рәүештә үтәйәсәкбеҙ, тип ышандырырға рөхсәт итегеҙ.

Трибунаға мастер Толчин күтәрелә. Ул үҙенең сығышында былай ти:

— Беҙ заводыбыҙҙы Ленин ордене менән наградлау тураһында шатлыҡлы хәбәрҙе еңеү көнендә ишеттек. Был көн завод коллективе тормошонда онотолмаҫлыҡ дата булып ҡалыр. Цех коллективе партия һәм хөкүмәтебеҙҙең хәстәрлегенә яуап итеп йыллыҡ планды срогынан алда, Октябрҙең 31 йыллығына үтәргә йөкләмә ала.

Унан һуң сығыш яһаусы цех начальнигы иптәш Идиатуллин цех работниктәренең даими эштәре, нефть эшкәртеүселәрҙең һәм тоҙһыҙландырыусылар мәсьәләһе хәл итеүҙәре тураһында һөйләне.

— Көнсығыш райондарының һәм Башҡортостан нефтселәренең, — тине үҙенең сығышында «Башнефть» берекмәһенең баш геологы, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш А. Трофимук, — беҙҙең бөтә илебеҙ үҙенең алдынғы коллективтарын күрә, беҙҙән өлгө ала. Мин нефть сығарыусылар исеменән нефть эшкәртеүселәрҙе был биш йыл эсендә күберәк нефть бирәсәкбеҙ, тип ышандырам. Юғары наградаға яуап итеп нефть сығарыу һәм эшкәртеү пландарын артығы менән үтәү өсөн социалистик ярышты тағы ла киңерәк йәйелдерәйек.

ВКП(б)-ның Черниковск ҡала комитеты секретаре иптәш Панкрин, «Башнефтезаводстрой» тресы управляющие Старинов иптәштәр сығыш яһанылар.

Митингыла ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете секретаре иптәш С. Бикбов сығыш яһаны. Ул ВКП(б) Өлкә Комитете һәм БАССР Министрҙар Советы исеменән коллективты юғары награда менән ҡотланы һәм артабан үҙенең бурыстарын һөйләп бирҙе. Уның тәҡдиме буйынса митинг ҡатнашыусылары бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ҡотлау хатын ҡабул иттеләр.

В. Попов.

Промысел коллективенең ғорурлығы

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша). Алдынғы нефтселәрҙе наградлау хаҡындағы 10 майҙа, көндөҙгө сменанан һуң, «Кесе промысел» коллективенең митингыһы булып үтте.

Нефтселәрҙең хеҙмәттәрен юғары баһалау, шул иҫәптән промысел ер аҫты ремонты буйынса өлкән мастере А. Г. Вахитовҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү менән ҙур шатлыҡ, тәрән ҡәнәғәтләнеү кисергән промысел кешеләре митингыла бер-бер артлы сығып һөйләнеләр.

Көслө алҡыштар аҫтында трибунаға Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Акмал Вахитов күтәрелә.

— Хеҙмәтемде юғары баһалаған өсөн, — тине ул тәрән тулҡынланыу менән, — Совет Хөкүмәтенә, большевиктар партияһына, тыуған Сталинға ихлас күңелдән рәхмәт әйтәм. Юғары наградаһы большевиктар партияһы члендарына хас булған ныҡышмалылыҡ, батыр хеҙмәт менән аҡларға һүҙ бирәм...

Ошо уҡ көн, кис менән, нефтселәрҙе наградлауға арналған дөйөм ҡала митингыһы булды. Унда алты мендән артыҡ кеше ҡатнашты. Митингыла ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға ҡотлау телеграммаһы ҡабул иттеләр.

Н. Старалубов.

ЮҒАРЫ НАГРАДА — ЯҢЫ ХЕҘМӘТ БАТЫРЛЫҠТАРЫНА РУХЛАНДЫРА

Радио ҙур шатлыҡлы хәбәр килтерҙе. Хөкүмәтебеҙ Тыуған ил алдындағы күренекле өлгәшеүҙәре өсөн Башҡортостан нефть промышленносенең алдынғы предприятиеларенән береһе булған «Туймазынефть» тресын һәм Өфө нефть эшкәртеү заводының юғары награда — Ленин ордене менән наградланы. Республикабыҙҙың күренекле нефтселәренән — Вәхитов, Куприянов, Кувыкин иптәштәргә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде.

Ошо уҡай менән 10 майҙа «Башнефть» берекмәһе клубында берекмә аппараты коллективенең митингыһы булып үтте. Митингыны берекмәнең баш геологы, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш А. Трофимук асты.

Трибунаға «Башнефтезаводтары» берекмәһе начальнигы иптәш Н. Вовченко күтәрелә.

Башҡортостан нефть промышленносе бөйөк Сталиндең ихтыяры һәм күрһәтмәһе буйынса, — тине үҙенең сығышында иптәш Вовченко, — сталинсә биш йыллыҡ йылдарында барлыҡҡа килде. Һәм ул «Икенсе Баку» системаһында алдынғы нефть районына әүерелде. Беҙ ошо бөйөк эштәр планын тормошҡа ашырыуыбыҙ менән ғорурланабыҙ. Республикабыҙҙың нефть промышленносе яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында нефть сығарыу һәм эшкәртеүҙең государство планын уңышлы үтәне. Ленин — Сталин партияһы тарафынан тәрбиәләнгән гүзәл кадрҙар республикабыҙҙың нефть промышленносен артабан үҫтереү өсөн үҙҙәрен аямай эшләйҙәр. СССР Верховный Советы Президиумы фидакәр хеҙмәт һалған алдынғы коллективтарҙы — «Туймазынефть» тресын һәм Өфө нефть эшкәртеү заводын иң юғары награда — Ленин ордене менән наградланы. Күренекле нефтселәр Вәхитов, Куприянов, Кувыкин иптәштәргә Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән маҡтаулы исем бирелде. Был юғары наградалар беҙҙе, нефтселәрҙе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн яңы хеҙмәт батырлыҡтарына рухландыра.

Унан һуң митингыла көнсығыш нефтселәр профсоюзы Үҙәк Комитетенең председателе Пшеницин, берекмәнең промыселдәр бүлеге начальнигы Логвинов, план бүлеге начальнигы Дмитриев иптәштәр сығыш яһанылар. Улар сығыштарында наградланыусы алдынғы предприятиеларҙың коллективтарын һәм юғары исем бирелгән иптәштәрҙе ҡайнар ҡотланылар һәм республикабыҙҙың нефтселәрен хөкүмәттең наградаһына тағы ла намыҫлыраҡ эшләү менән яуап бирергә саҡырҙылар.

Башҡортостан нефть промышленносенең тағы ла ҙурыраҡ уңыштары өсөн

СССР Верховный Советы Президиумының 1948 йыл 8 май Указдары менән «Туймазынефть» тресы һәм Өфө нефть эшкәртеү заводы Ленин ордене менән наградланды. Башҡортостан нефть промышленносенең күренекле работниктәре С. И. Кувыкин, И. Д. Куприянов һәм А. Г. Вәхитов иптәштәргә Социалистик Хеҙмәт Геройы тигән бөйөк исем бирелде һәм йөҙҙәрсә нефтселәр Советтар Союзы ордендәре һәм медалдәре менән наградландылар. Был күп һандағы нефтселәрҙең наградланыуы ордене Башҡортостандың бөтә хеҙмәтсәндәре өсөн шатлыҡлы ваҡиға булып тора.

Башҡортостан нефтселәренең илебеҙгә әленән-әле күберәк нефть бирә барып, социалистик экономика фондына ҡиммәтле вклад һалғанлыҡтары билдәле. Беҙҙең республикабыҙҙың нефть промышленносе эш темпын йылдан-йыл арттыра бара. Ул яңы биш йыллыҡтың тәүге ике йылында планды арттырып үтәне. 1947 йылда нефть сығарыу, 1946 йылға ҡарағанда, 41 процентҡа һәм нефть эшкәртеү 12 процентҡа артты. 1948 йыл Башҡортостан промышленносенең төп тармағы булған нефть хужалығының бөтә звеноларында яңы күтәренке темптар бирә.

Башҡортостан нефть промышленносендә өлгәшелгән уңыштар, бөйөк Сталин етәкселегендә большевиктар партияһы тарафынан тәрбиәләнгән беҙҙең нефтселәребеҙҙең фидакәр рәүештә эшләүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора. Беҙҙең нефть промышленносебеҙ шундай эшлекле, Ленин—Сталин партияһының эшенә бирелгән кадрҙарға бай.

Ундай кадрҙар, бөтәһенән элек, беҙҙең орденле предприятиеларебеҙҙә күптәр. «Туймазынефть» тресы һәм Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективтәре биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышты башлап ебәреүсе булып торалар. Башҡортостан нефть промышленносе нефть сығарыуҙа һәм эшкәртеүҙә юғары темпты тәьмин итеү менән, барыһынан элек, был ике коллективтең яҡшы эшләүҙәренә бурыслы. «Туймазынефть» тресы, үҙенең девон нефтенә бик бай запастары менән, Советтар Союзында нефть сығарыусы иң ҙур трестарҙың береһе булып тора. 1947 йыл бында тиҙләтелгән метод менән бораулаусылар хәрәкәте тыуҙы. Трест коллективе, нефть ятышлы яңы районды үҙләштереүҙең ҡыйын шарттарында государство пландарын үтәү өсөн фидакәр рәүештә эшләй. Шулай уҡ, Өфө нефть эшкәртеү заводы беҙҙең республикабыҙҙың алдынғы предприятиеларенән иҫәпләнә. Бында, алдынғы технологтар һәм операторҙар һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ осоронда нефть эшкәртеүсе установкаларҙың проект ҡеүәтен күпкә арттырҙылар, яңы технологик процестарҙе үҙләштерҙеләр һәм хәҙер, 1948 йыл аҙағына, 1950 йыл планы күрһәткестәренә өлгәшеү өсөн көрәшәләр.

Нефть промышленносенең ҡеүәтле күтәрелеше өсөн дөйөм көрәштә күп эшселәр, инженерҙәр, техниктар һәм хеҙмәткәрҙәр айырыуса яҡшы эшләнеләр. Дөйөм маҡсатҡа өлгәшеү өсөн уларҙың һәр береһе үҙенең фидакәр хеҙмәтен һала. «Башнефть» берекмәһенең начальнигы — Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш С. И. Кувыкин — талантлы инженер, яҡшы ойоштороусы. Ул Башҡортостан нефть промышленносендә 6 йылдан артыҡ эшләп килә. Уның етәкселегендә нефть промышленносе предприятиелары иң мөһим бурыстарҙы хәл итәләр. Туймазыла нефть сығыу урынын асҡаны өсөн 1946 йылда иптәш Кувыкинға беренсе дәрәжәле Сталин премияһы лауреаты исеме бирелде. Социалистик Хеҙмәт Геройы, Октябрьскиҙә бораулау мастере И. Д. Куприянов бораулауҙа юғарылатылған тиҙлек индереүҙең инициаторы булды. Ул, был хәрәкәтте Октябрьск бораулаусылары араһында башлап ебәреп, тәрән схважиналарҙы бораулауҙа әленән-әле яңы тиҙлектәргә өлгәшә килә. «Ишембайнефть» тресының скважиналарҙың ер аҫты ремонты буйынса өлкән мастере, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш А. Г. Вәхитов нефть өсөн арымай-талмай көрәшеүсе. Ул ер аҫты ремонты нормаһын систематик рәүештә арттырып үтәп килә, производствоға индерелгән күп һандағы рационализаторлыҡ тәҡдимдәр бирҙе.

Беҙ, хөкүмәт наградалары менән бүләкләнеүселәр араһында, беҙҙең нефть промышленносе үҫешенә нигеҙ һалған Баку һәм Грозный нефтселәренән өлкән быуын вәкилдәрен һәм улар етәкселегендә үҫеп еткән йәштәрҙе күрәбеҙ. Улар араһында Сталинсә премия лауреаттары — геологтар, Социалистик Хеҙмәт Геройы А. А. Трофимук, Т. М. Золоев һәм М. В. Мальцев иптәштәр бар. Улар Туймазыла бай нефть ятышын асыу һәм уны артабан киңәйтеү менән беҙҙең нефть байлыҡтарыбыҙҙы бик күпкә арттырҙылар.

Наградланыусылар араһында шулай уҡ беҙҙең иң яҡшы бораулаусыларыбыҙҙан — инженерҙәребеҙҙән А. Т. Шмарев, М. А. Потюкаев, Октябрьск һәм Ишембайҙың иң яҡшы бораулау мастерҙәре Балабанов, Алексеев, Кнутов, Ғабдуллин, Бухов, бораулаусы Ғафаров, Ғәлимов һәм башҡа иптәштәр бар. Бораулау — иртәгәһе көндең нефте тигән һүҙ. Был — эштең айырыуса ауыр һәм ҙур участкаһы. Ул беҙҙә һуңғы ваҡытҡа тиклем артта ҡалыусы участка булып килде һәм сезонлы характерҙа булды. Беҙҙең бораулаусыларыбыҙҙың күрһәткән ҙур хеҙмәттәре шунан тора, улар иҫке нормаларҙы, артта ҡалған ҡараштарҙы ҡыйыу рәүештә емерҙеләр, бораулау тиҙлеген байтаҡ арттырҙылар. 1947—48 йылдарҙың ҡышында скважиналарҙы бораулау тиҙлеге байтаҡ артты. Был, станоктарҙың һәм бораулау бригадаларының һанын ныҡ арттырмайынса ла өлгәшелде.

Нефть промыселдәренең работниктәре — операторҙар, мастерҙәр, ремонтсылар өҙлөкһөҙ рәүештә хеҙмәт вахтаһын алып баралар. Ҡояшлы эҫе көндә лә, ҡышҡы һыуыҡта ла, ғәҙәттәге көндә лә, байрам көнөндә лә улар өҙлөкһөҙ постта торалар, нефть скважиналарының эшен күҙәтәләр. Улар һәр бер скважинаның, ул йөҙәр тонна йәки бер нисә йөҙ килограмм нефть бирәме, уны барыбер, һөйөп ҡарайҙар. Промысловиктәрҙең оҫта ҡуллары менән хәрәкәткә килтерелә торған шундай йөҙҙәрсә скважиналарҙың өҙлөкһөҙ эшләүҙәре менән совет халҡы байлыҡтарының дөйөм фондына Башҡортостан биргән нефть йөҙ меңдәрсә һәм миллиондарса тонналар тәшкил итә. Намыҫлы хеҙмәттәре өсөн наградланыусылар араһында беҙ үҙебеҙҙең иң яҡшы промысел эшселәре Варенев, Шафикова, Илиатуллин һәм инженер Кашапов, Перегудов, Шитова һәм башҡа иптәштәрҙе күрәбеҙ.

Сығарылған нефттән нефть эшкәртеү заводтарында һәр төрлө кәрәкле продукциялар етештерелә. Совет халҡының тырышлығы менән большевиктар партияһы етәкселегендә беҙҙә беренсе класлы нефть эшкәртеү заводтары төҙөлдө, улар иң яңы техника менән байытылғандар. Нефть эшкәртеүселәрҙең күп меңле армияһы үҙҙәренең орденле стахановсыларын — Әхтәмов, Осадченко, Бикметов, Ежов, Толчин, Педогоров һәм башҡа бик күп иптәштәрҙе ғорур рәүештә ҡотлай. Улар Башҡортостан нефтенән тыныс төҙөлөш өсөн дә, илебеҙҙең оборонаһы өсөн дә кәрәк булған һәр төрлө нефть продукттары ала белделәр.

Нефть промышленносе төҙөүселәре лә хөкүмәт наградалары алыуға лайыҡ булдылар. Улар араһында трестар менән идара итеүсе Стариков, Башилов иптәштәр, эшселәрҙән Бузулков, Кутлин һәм башҡа иптәштәр бар. Үҙған йыл төҙөүселәрҙең тырышлыҡтары менән Туймазы һәм Өфө араһындағы ҡеүәтле нефтепровод төҙөү тамамланды, нефть эшкәртеүҙә яңы ҡеүәттәр индерелде, яңы мәктәптәр, балалар учреждениелары һәм нефтселәр өсөн йорттар төҙөлдө. Яңы биш йыллыҡта нефть промышленносенең ундарса яңы предприятиелары, нефтселәр өсөн йөҙ мендәрсә квадрат метр торлаҡ йорттары төҙөләсәк, Башҡортостан нефтепроводтар селтәре менән, урман булып торған нефть вышкалары һәм яҡшы асфальт юлдар менән ҡапланасаҡ. Тура-нан-тура нефть сығарыусы һәм эшкәртеүсе нефтселәрҙең генә түгел, бәлки Башҡортостан нефть промышленносенең үҫеүенә булышлыҡ иткән бик күп төрлө башҡа категориялағы работниктәрҙең — механиктәрҙең, электриктәрҙең, фәнни, партия, совет һәм профсоюз работниктәренең хеҙмәттәре лә хөкүмәт тарафынан лайыҡлы рәүештә билдәләнде.

Беҙ Башҡортостан нефть промышленносенең миҫалында, серек барыусы капитализм системаһынан бөтөнләй айырылған социализмдең йәшәү ижади көсөн күрәбеҙ. Большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте беҙҙең республикала нефть промышленносен үҫтерә барып, башҡорт халҡына бөтә промышленностең бөтә байлыҡтары менән файҙаланыуҙы тәьмин иттеләр. Башҡортостанда нефть промышленносы төп тармағы булып тора. Ул яңы ҡалалар тыуҙырҙы, халыҡ хужалығының башҡа тармаҡтары үҫешен байтаҡ еңеләйтте. Башҡортостан нефть промышленносе республиканың культураһы, халыҡ һаулығын һаҡлау үҫеше өсөн ул миллионлаған һум средство килә. Башҡорт халҡы тәренән квалификациялы эшселәр, инженерҙәр һәм техниктар үҫәле. Бөгөн уларҙан йөҙәрләгән кешеләр хөкүмәттең юғары наградаһына лайыҡ булды.

Капиталистик илдәрҙә нефть ятыштары бөтөнләй башҡа картинаны күрһәтәләр. Унда нефть ятыштары урынындағы халыҡ өсөн тулыһы менән бер бәхетһеҙлек кенә булып тора. Америка империализмының ерткестары нефтле ерҙәң һәм кеше ҡулдарын һыҙҙылар. Улар Ираҡ һәм башҡа шуның кеүек илдәрҙең нефть байлыҡтарын түгел, бәлки бойондороҡһоҙлоҡтарын да йоттолар. Унда хеҙмәтсәндәрҙең ихтыяждары тураһында һүҙ ҙә юҡ. Бөтә нәмә капиталистик файҙа алыу интерестарына буйһондоролған. Башҡортостан хеҙмәтсәндәрен ундай яҙмыштан Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы ғына, Ленин—Сталин партияһы ғына ҡотҡарып ҡалды.

Башҡортостан нефтселәре алдында яңы яуаплы бурыстар тора. Уларҙың үҙҙәренең тәүге уңыштары менән генә туҡтап ҡалмаҫтарына, Тыуған илебеҙҙең юғары наградаһына яуап итеп, сталинсә яңы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәштә бөтә көстәрен һаласаҡтарына шик юҡ.

С. БИКБОВ.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете секретаренең нефть һәм химия промышленносе буйынса урынбаҫары.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Конференциянан һуң

Ишембай ҡала партия ойошмаһының IV конференцияһы ВКП(б) ҡала комитетенең эшендәге серьез етешһеҙлектәрҙе асҡайны. Унда партияның эске эшендәге, промышленность менән етәкселектәге һәм хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эштәге кәмселектәр ҡаты тәнҡитләнде. ВКП(б)-ның ҡала комитеты был большевистик тәнҡиттән дөрөҫ һығымта яһаны һәм үҙенең эш стилен партияның ҡала һәм өлкә конференцияларының күрһәтмәләре нигеҙендә үҙгәртеп ҡорҙо. Өлкә һәм ҡала конференцияһының йомғаҡтары тәүге партия ойошмаларының йыйылыштарында тикшерелде. Былар һөҙөмтәһендә коммунистарҙың активлеге тағы ла күтәрелде, тәүге партия ойошмаларында партия-политик һәм ойоштороу эштәре байтаҡ яҡшырҙы.

ВКП(б) ҡала комитете конференция ҡарарҙарын тормошҡа ашырыу буйынса 1948 йылдың II кварталына перспектив план төҙөнө. Бында төп иғтибар партияның эске эштәрен, промышленноста етәкселектең кимәлен тамырынан уҡ яҡшыртыуға һәм хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште киң йәйелдереүгә йүнәлтелде. Билдәләнгән саралар эҙмә-эҙ рәүештә үтәлә баралар. ВКП(б)-ның ҡала комитете хәҙер элекке кеүек тәүге партия ойошмаларын урап үтмәй, ә уларға таянып эш күрә, тәүге партия ойошмаларының секретарҙарына практик ярҙам күрһәтә. Апрель айында промышленность предприятиеләрендәге һәм учреждениеләрҙәге партия ойошмалары секретарҙарының семинарҙары үткәрелде. Шулай уҡ, партгруппоргтарҙың, агитаторҙарҙың һәм стена газетаһы редакторҙарының семинарҙары булып үтте.

Промышленность предприятиеләрендә тәүге партия ойошмалары секретарҙарының семинарында эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыуға киң урын бирелде. Бында «Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышҡа партия ойошмаларының етәкселеге» тигән мәсьәлә тикшерелде. Нефть ҡыҙыу заводы партия ойошмаһының секретаре иптәш Томилин «Социалистик ярышты ойоштороу, уға контроль яһау һәм үтәлеште тикшереү» тигән темала, 2-се промысел партия ойошмаһы секретаре иптәш Урманов «Социалистик ярыш йомғаҡтарын иҫәпкә алыу һәм уны бөтә эшселәргә лә еткереү» тураһында доклад яһанылар. Үҙәк электр станцияһы партия ойошмаһының секретаре иптәш Ишмөхәмәтовтың «Партия ойошмаһы предприятиенең рентабелле эшләүе өсөн көрәштә» тигән темалағы сығышы айырыуса ҡыҙыҡлы үтте. Ошо уҡ семинарҙа «Партия эшен планлаштырыу», «Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик аң тәрбиәләү» тигән темаларҙа докладтар тыңланды.

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитете тәүге партия ойошмалары секретарҙарының семинарҙарын үткәреү менән генә сикләнмәйенсә, уларҙың отчеттарын бюро ултырышында тыңлауҙы практикаға индерҙе. Апрель айында «Предприятиелә продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәш», «ВКП(б) членлегенә кандидаттар менән эшләү», «Коммунистарҙы идея-политик яҡтан тәрбиәләүҙең торошо», «Комсомолға партия етәкселеге», «Социалистик ярышҡа етәкселек» тураһында партия ойошмалары секретарҙарынан бер нисә иптәштең отчеты тыңланды. ВКП(б)-ның ҡала комитете партияның эске эштәрен яҡшыртыуға серьез иғтибар бирә.

ВКП(б)-ның ҡала комитете работниктәре өсөн айға бер-ике тапҡыр производство кәңәшмәләре үткәрелә. Бында эшкә йомғаҡ яһала һәм яңы бурыстар ҡуйыла. Етәксе работниктарҙың эш квалификацияһын һәм политик белем кимәлен күтәреү маҡсатында, аҙнаға бер тапҡыр семинар үткәрелә. Семинарҙарҙа «Партия-политик эште хужалыҡ эше менән яраштырып алып барыу», «Партия работнигы — политик етәксе», «Партия комитете инструкторының эше» һәм башҡа темалар тикшерелә. Шулай уҡ, политик һәм экономик темаларҙа доклад, лекциялар бик йыш ойошторола.

Конференция күрһәтмәләренән сығып, ҡала комитете коммунистарҙы тәрбиәләүгә, уларҙың политик белем кимәлдәрен күтәреүгә, халыҡ араһында политик эште көсәйтеүгә бик ныҡ иғтибар бирә. ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәктәренең етәкселәренә, агитколлектив етәкселәренә инструктаж үткәрелде. Агитаторҙар, пропагандистар өсөн систематик рәүештә инструктив доклад һәм лекциялар үткәрелә. Политик мәктәптәрҙең һәм түңәрәктәрҙең эше хәҙер һиҙелерлек уҡ йәнләнде.

Ҡаланың интеллегенцияһы менән эшләүгә ныҡлы иғтибар бирелә. Улар өсөн систематик рәүештә лекциялар уҡыла. Лекциялар интеллегенцияның айырым группалары өсөн дифференциаль рәүештә ойошторола. Мәҫәлән, уҡытыусыларға 8 һәм врачтарға 5 темала лекция уҡылды.

Ҡала комитетенең, учреждение һәм предприятиеләрҙең етәксе работниктәре эшселәр араһында политик докладтар менән йышыраҡ сығыш яһай башланылар. Лекциялар күберәк партияның тарихе һәм теорияһы буйынса, шулай уҡ «Беҙҙең маҡсат — коммунизм», «Яңы демократия илдәре социализмға барыу юлында», «Коммунистик аңлылыҡ тәрбиәләү» тигән темаларҙа уҡылды.

Үткәрелгән был саралар һөҙөмтәһендә бөтә партия-политик һәм ойоштороу эштәренең кимәле күтәрелде. Тәүге ойошмаларҙа партияның эске эштәре йәнләнде, большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит киң йәйелдерелде. Коммунистарҙың политик уҡыуҙарының кимәле күтәрелде.

ВКП(б)-ның Ишембай ҡала комитете партия конференцияһы ҡарарҙарын үтәү буйынса тәүге аҙымдарҙы атланы. Ләкин был ҙур эштең башланғысы ғына әле һәм улар тынысланырға хоҡуҡ бирмәйҙәр. Алда бик күп эшләһе, партия демократияһын еренә еткереп, партия һәм совет кадрҙарын һайлап алыу, эшкә урынлаштырыу һәм тәрбиәләү буйынса күп көс һалаһы бар әле.

С. Федотов.

ВКП(б) Өлкә Комитете инструкторы.

Политик мәктәптәр эштәрен тамамланылар

Ҡыйғы районының «Октябрь» колхозы тәүге партия ойошмаһы эргәһендә ойошторолған политик мәктәп үҙенең эшен тамамланы.

Политик мәктәптә уҡыған коммунистар программа материалдарын яҡшы үҙләштерҙеләр. Партия члендәре Миңнеәхмәтов, Ласынов, Һадиев һәм Кирамова иптәштәр үҙҙәренең белемдәрен күтәреү өсөн айырыуса тырышып эшләнеләр. Улар һынауҙарҙы «отлично» һәм «яҡшы» билдәләренә тапшырҙылар.

Түбән Ҡыйғы ауыл Советы һәм Фрунзе исемендәге колхоз тәүге партия ойошмаларының политик мәктәптәре лә уҡыуҙарын тамамланылар.

М. Фәссәхов,

ВКП(б)-ның Ҡыйғы райкомы пропагандисы.

* * *

Ғафури район үҙәгендәге киске партия мәктәбендә һынауҙар булды. Һынауҙарҙың һөҙөмтәләре яҡшы. Коммунистарҙың күпселеге һынауҙы «отлично» һәм «яҡшы» билдәләренә тапшырҙылар.

Тәүге партия ойошмалары эргәһендәге 9 политик мәктәп һәм «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү түңәрәктәре лә эштәрен тамамланылар.

Йәғфәр Ғәлиев.

* * *

Дәүләкән районы Ҡаҙанғол совхозының тәүге партия ойошмаһы коммунистарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреү мәсьәләһе менән серьез шөғөлләнә. Коммунистар барыһы ла теге йәки был форма уҡыу менән солғап алынғандар. 5 коммунист партия тарихын үҙ алдына өйрәнә, 14 коммунист политик мәктәптә уҡыны. Политик мәктәпкә партия ойошмаһы секретаре иптәш Лаврушин үҙе етәкселек итте.

Хәҙер политик мәктәп үҙенең эшенә йомғаҡ яһаны. Коммунистар үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштерҙеләр.

Х. Атнағолов.

—☆—

Докладсылар группаһы

Комсомолдың Ҡырмыҫҡалы район комитете эргәһендә ун бер кешенән торған докладсылар группаһы эшләп килә.

Һәр бер докладсыға айырым тема бирелгән һәм доклад группаның дөйөм йыйылышында тикшерелгәндән һуңында халыҡ араһына сығарыла.

Комсомол райкомының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире иптәш Маләрчук «Ленин комсомолы тураһындағы» лекцияһын өлкә ауыл хужалығы мәктәбендә уҡыны. Йәштәр лекцияны ҙур иғтибар менән тыңланылар һәм ошондай лекцияларҙы йышыраҡ үткәреүҙе һоранылар.

Ф. Сәттәров.

БИШ ЙЫЛЛЫҠТЫ—ДҮРТ ЙЫЛДА!

Май алды ярышындағы уңыштарҙы нығытырға һәм күбәйтергә

Өфө яҙыу машиналары заводының быйыу механигы иптәш П. В. Ерошин Май алды социалистик ярышҡа ҡушылып, айлыҡ нормаһын 150 процентҡа үтәргә йөкләмә алғайны. Ул үҙ йөкләмәһен 250 процентҡа еткереп үтәне.

Һүрәттә: П. В. Ерошин иптәш эш өҫтәлендә.

В. Жданов фотоһы.

Алдынғы сафта

Черниковск ҡалаһының 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһы быйыл үҙенең эшен байтаҡ яҡшыртыуға өлгәште. Фабрика беренсе квартал планын 142,4 процентҡа үтәне һәм пландан тыш ярты миллион һумдан артығыраҡ файҙа бирҙе. Үҙған йылдың ошо осороно сағыштырғанда бер эшсенең эшләп сығарыуы ике ярым тапҡырға артты. Яғыулыҡҡа 3,3 процент, электр энергияһына 4 процент экономия яһалды һәм һәр бер йәшник шырпының үҙенә төшөү хаҡы планға ҡарағанда 3 һум 20 тингә түбәнәйтелде.

Яҡшы күрһәткестәре өсөн фабрика Министерство тарафынан ике тапҡыр бүләкләнде. Ул бөтә Союз социалистик ярышында икенсе урынды һәм Черниковск предприятиеләре араһында беренсе урынды алды.

Коллектив Май алды социалистик ярыш йөкләмәһен дә уңышлы башҡарып, беренсе майҙы ярты йыллыҡ программаны тамамлап ҡаршыланы.

Үҙған йылда насар эшләп килгән был предприятиенең быйыл ошондай һөҙөмтәләргә өлгәшә алыуының сере нәмәлә һуң?

Бөтәһенән дә элек, алынған йөкләмәләрҙе үтәү һәм арттырып үтәү өсөн бөтә эшселәрҙең һәм инженер-техник работниктарҙың намыҫлы көрәшеүендә. Хәҙер йөкләмә һәр бер эшсе өсөн генә түгел, ә бәлки һәр бер инженер-техник работник өсөн дә закон булып әүерелде. Һәм ошоға ярашлы рәүештә яңы йыл башынан уҡ планлаштырыу эше лә үҙгәртеп ҡоролдо. План төҙөгәндә, ярыш йөкләмәләренән сығып, бөтә эске резервтар һәм мөмкинлектәр иҫәпкә алына. Һәр бер работникка үҙенең смена, декада һәм айлыҡ производство задаһиеһе еткерелә.

Социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлешен һәр ваҡыт ентекле тикшереү теге йәки был участкаһын, агрегаттың артта барыуы сәбәптәрен үҙ ваҡытында асырға, етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөргә мөмкинлек бирә.

Фабрикала һәр бер эшсенең, бригада, смена цехтың көндәлек эш йомғаҡтары күрһәткес таҡталарында яҙылып барыла. Стена газеталарында, «молнияларҙа» производство алдынғыларының эш тәжрибәләре яҡтыртыла. Ошолар менән бер рәттән агитаторҙар алдынғы методтар тураһында эшселәр араһында киң һәйбәт беседалар үткәрәләр.

Социалистик ярышты ошолай ойоштороу арҡаһында коллективта үҙенең нормаһын үтәмәүсе бер генә эшсе лә юҡ. Бында эшселәрҙең 80 проценте самаһын стахановсылар һәм ударниктәр тәшкил итәләр. Производство алдынғылары Заболотова, Исламова, Луцева, Николотов, Киреев, Ғилмияров кеүек иптәштәр өс — өс йыл ярымда биш йыллыҡ норма бирергә булдылар.

Бөтә йәш эшселәр техминимум түңәрәктәрендә, мастерҙар махсус курстарҙа уҡыйҙар. Бынан тыш бөтә яуаплы работниктәр экономик мәсьәләләр буйынса ойошторолған семинарға йөрөйҙәр.

Фабриканың коллективы Май алды ярышында өлгәшкән уңыштары менән тынысланып ҡалмаҫҡа, ә бәлки уларҙы нығытып, Черниковск ҡалаһы предприятиеләре араһында киләсәктә лә алдынғы урында барыу өсөн намыҫлы көрәш ойошторорға тейеш.

П. Васильев.

Пландан тыш продукция

Резина заводының коллективы бөйөк байрамды юғары производство уңыштары менән билдәләне. Завод үҙенең айлыҡ программаһын срогынан алда тамамлап, пландан тыш йөҙ мең һумлыҡ продукция эшләп сығарҙы.

Комсомолец-йәштәр бригадалары быйыл бик көндә айырыуса юғары хеҙмәт өлгөләре менән ҡаршылайҙар. Иптәш Юденцева етәкселегендәге бригада бөтә айлыҡ программаһын тамамланы. Его шкина, Кожарева иптәштәрҙең бригадалары ла стахановсы вахтаға баҫып, алған йөкләмәләрен үтәүҙә [illegible] иҫәпләй. Иптәш Кожарева бригадаһының члены, клейщица Засыпкина сменаларының береһендә 300 дана урынына 705 дана трубка етештереп, заводта үҙенә рекорд биргәйне. Уның өлгөһендә йәш эшсе Семенова, Львовалар был нормаһы 750 данаға еткереп үтәнеләр. Тәүге рекорд бирәүсе иптәш Засыпкина һуңғы көндә сменаһында 865 дана трубка етештереп, заводта тағы ла юғары рекорд ҡуйҙы. Йәштәр бына шулай ярышып эшләйҙәр.

Г. Әмир.

1953 йыл иҫәбенә

Электротехник заводтың комсомолец-йәштәр бригадаһы Беренсе Май байрамы хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып эшләне. Йәштәрҙән 85 кеше айлыҡ нормаларын икеләтә арттырып үтәне. Иптәш Ғарифуллин етәкселегендәге биш кешенән торған слесарҙар бригадаһы һәр көн ике ярым—өс норма бирҙе.

Заводта инде биш йыллыҡ норманы үтәүсе күп кенә эшселәр бар. 30-ҙан артыҡ эшсе инде 1952—53 йыл иҫәбенә эшләй. Улар иҫәбенә кабельщица Ғарифуллина, столяр Караваев револьверщица Тишина, йыйыусы Насибуллина иптәштәр инәлар.

З. Ишбулатов.

140 мең һум файҙа

«Башмельтрест» системаһындағы мелькомбинаттарҙың коллективтары биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү лозунгыһы аҫтында эшләйҙәр. Намыҫлы хеҙмәт һөҙөмтәһендә ош эшкәртеү буйынса апрель айы планы бөтә трест күләмендә срогынан 8 көн алда үтәлде.

Бәрә, Яңауыл, Әлшәй мелькомбинаттары айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Бәрә мелькомбинаты ағымдағы йылдың өс ярым ай ваҡыт эсендә 5 айлыҡ планды үтәне.

Мелькомбинаттар государственная дотация алмай эшләү өсөн көрәшеп, ағымдағы йылда пландан тыш 140 мең һум файҙа килтерҙеләр.

Х. Аҙнабаев.

Ҡандра күл ауылында

Ҡандра күленә алһыу нурҙарын һибеп, аяҙ офоҡта яҙғы таң атты. Ҡандра күл ауылы таң менән бергә уянды. Береһенән икенсеһе уҙҙырырға тырышҡан һымаҡ, ҡураларҙа асыҡ тауышлы әтәстәр ҡысҡыра, тауыҡтар ҡыткылдай. Яҙғы яҡты таңды маҡтап ҡотлағандай, алһыу офоҡҡа ҡарап, ҡанаттарын тибрәндереп, сыйырсыҡтар һайрай. Ҡыйыҡтар аҫтындағы ояларҙа ниндәйҙер ҡыуаныслы моң менән күтәренкеләр гөрләй. Ялҡау ғына ҡанат ҡағып, ҡарҡылдап, ауыл өҫтөнән ҡара ҡарғалар үтәләр. Һыйыр, һарыҡтар, быҙауҙар тауышы, аттар кешнәүе, тракторҙар гөрөлдәүе ҡураларҙан, урамдарҙан үтеп, күлдең алыҫ ярҙарына тиклем тарала. Ҡайҙалыр дәртле талъян уйналды. Йыр башланды. Бригадалар, звенолар эшкә ҡуҙғала.

Мәһинур апай һыйырын һауып, балаларына ашарға әҙерләп ҡуйҙы ла, йоҡлап ятҡан өс балаһының олоро ғын уятып: «Балам, ашарығыҙға әҙерләнем, үҙегеҙ ашарһығыҙ; мин баҫыуға китәм» — тине һәм, йылдам ғына атлап, өйҙән сығып китте.

Ул Ҡандра күленең көньяҡтағы бейек ярына үрләгән юл менән китте. Үргә үрләү еңел түгел, шулай ҙа ул үҙенең ғәҙәттәге йылдам аҙымын юғалтманы. Бейек яр өҫтөнә күтәрелгәс, бер минутҡа туҡтап, рәхәтлек менән тәрән һулыш алып, кире боролоп ҡараны. Өлкән күлдең арғы яҡ ярынан ошо керепкелә шат ҡояш нурлы күҙҙәрен тулатып, тап-тура Мәһинур апайҙың йөҙөнә текәлде. Ҡояш уға: «Миңән алда уянып, эшкә ҡуҙғалған хеҙмәт кешеләрен яратам мин» тигән һымаҡ булып күренде. Өлкән күлдең ҡышҡы тыныслығын һаҡларға тырышҡан кеүек, һаман әле уның уртаһында күгелйем ҡалын боҙ ята. Ләкин ҡышҡы күлде йылы яҙ еңгән инде. Уның ситтәрендә тоноҡ һыу йылтырай. Унда хәҙер аҡсарлаҡтар, ҡырағай өйрәктәр күп йөҙә. Әнә балыҡсылар, таң менән ауҙарын ҡарап, хәҙер кәмәләрен ярға сығаралар. (Бында балыҡсылар күп. Шуның өсөн дә Ҡандра күл ауылындағы колхозға «Ҡыҙыл балыҡсы» тип исем биргәндәр).

Үрҙән ҡарағанда, Ҡандра күленең буйҙары тағы ла матурыраҡ, асығыраҡ һәм тулыраҡ булып күренә. Тормош та шулай үргә күтәрелгән һайын матурлана бара. Бер саҡ Мәһинур апай үҙен бик бейек ярҙан ниндәйҙер бер ҡара упҡынға тәгәрәгән кеүек итеп һиҙгәйне. Ул 1942 йылда иренең һуғышта һәләк булыуы тураһында хәбәр алған минуттарҙа ине. «Бәк ҡына был өс бала менән бер үҙем ҡалай донъя күтәрмәм...» тип, йәш түккән минуттары булды. Ләкин ауыр ҡайғыны нисек булһа ла еңергә кәрәк ине. Сөнки еңелмәгән ҡайғының һаман аҫҡа тартыуы мөмкин. Мәһинур апай шул саҡта күҙ йәштәрен һөрттө лә, балаларына әйтте: «Мин хәҙер һеҙгә әсәй ҙә һәм атай ҙа. Иҫән булһам, һеҙҙе йәтимһенәтмәм. Иламағыҙ, балалар, атағыҙ һуғышҡа төшөп үлмәгән, ил өсөн үлгән...» тип хәсрәтле балаларын йыуатты. Һәм Мәһинур апайҙың үҙен дә йыуатыусылар күп булды. Йыуатыусылар араһында күршеләге бер аҡыллы ҡарттың тәрән мәғәнәле һүҙҙәре бик оҡшаны. Ул ҡарт уға: «Ҡайғыны, Мәһинур килен, күҙ йәше менән еңеп булмай, уны эш, хеҙмәт менән еңергә кәрәк» — тине. Тәжрибәле ҡарттың был аҡыллы һүҙҙәре уға һәр ваҡыт ниндәйҙер көс биреп торалар кеүек. Ул бөтә көсөн, дәртен хеҙмәткә бирҙе. 1942 йылдан ошо көнгә тиклем звено башлығы булып эшләп килә. Уның эшенә, үҙен иң эшлекле итеп һанаған ирҙәр ҙә һоҡланалар. Колхозда иң алдынғы звено — уның звеноһы, һәр йыл һайын маҡтала һәм бүләкләнә килә. «Ирһеҙ бер үҙем өс бала менән нисек көн итермен?» тигән аптырауҙы уй уның башына хәҙер инмәй юҡ. Ул бер нәмәгә лә мохтаж түгел.

1947 йылда Мәһинур апай 20 гектарҙан 22-шәр центнер арыш алды.

Был колхозда йәшелсә үҫтереү буйынса эште артыҡ ырата алмайҙар. Шуның өсөн быйыл был эште Мәһинур апайға тапшырҙылар. «Уға Мәһинур Шәйхетдинова тотонһа, моғайын эш икенсе булыр» тинеләр.

Йәшелсә баҡсаһының ере Өсән йылғаһы буйында. Мәһинур апай әнә шул ерҙе ҡарарға китеп бара. Ул бейек ер башынан Ҡандра күленә бер минут самаһы ғына ҡарап торҙо ла, тағы ла алға китте. Ярҙы үткәс, уны көмөш тауышлы, шат һабан турғайы дәртле моң менән һайрап ҡаршы алды. Ул «Мәһинур апай килә!» тип ҡысҡырған төҫлө еңел ҡанаттарын тибрәндереп, уның алдынан ғына зәңгәр күккә күтәрелде. Ниндәй моңло уның тауышы! Ниндәй шат ул! Ул зәңгәр бушлыҡтан яҙғы ер матурлығына ҡарап хайран ҡалыумы, әллә үҙ тауышына үҙе ғашиҡ булыумы, нәмәгәлер иҫерә кеүек булып күренә. Күктә һайрап, ергә кире төшкәндә, ни өсөндер шулай тоЙола.

Мәһинур апайҙың алдынан аппаҡ күбәләк осоп үтте. Уның шат йөҙө тағы ла асылып китте. Был күбәләк уға быйылғы бәхете, шат ғүмере булып күренде. «Ярай әле, бәхеткә ҡаршы, һары күбәләк булманы. Яҙ башында һары күбәләк күрһәң, йыл ҡайғылы үтә, тиҙәр бит ҡарсыҡтар» тип, аҡ күбәләк күреүенә шатланып ҡуйҙы.

Һарыһы, ҡараһы осраһа ла, ҡайғырмаҫ Мәһинур апай. Күбәләктәр яҙмыш хәбәрсеһе түгел. Күбәләктәр һинең яҙмышыңды хәл итмәҫ. Бәхетле яҙмыш һинең үҙ ҡулыңда. Тормош ләззәте, бәхет—фәҡәт хеҙмәттә. Бөтә нәмә хеҙмәт менән табыла.

Өсән һыуы Ҡандра күл ауылынан дүрт километр. Мәһинур апай унда 35—40 минут самаһы ваҡыт эсендә барып етте. Өсәң тауҡыны тугайҙарҙы ҡаплаған. Яр буйындағы таллыҡтарҙың, тик баштары ғына күренеп ултыра. Һыу тыныс. Ләкин ошо тыныс һыуға ҡарап торған Мәһинур апайҙың күңеле тыныс түгел. Уның күңеле, быуған бер нисә көн элек шаулап боҙҙары аҡтарылған Өсән кеүек тынысһыҙ. Сөнки уның йәшелсә баҡсаһы майҙанының күп өлөшө ташҡын һыуы аҫтында. «Быйыл яҙ, бүтән йылдарға ҡарағанда, ни өсөндер, һуңлабыраҡ килде. Һыу бик оҙаҡ ятмаһа ярар ине», тип борсола. Ултыртыу өсөн уның бөтә орлоҡтары әҙер, анализ яһалған, һәр бер төр орлоҡто үҙе шыттырып ҡараны. Орлоҡтар һәйбәт. Улар инде хәҙер бөтәһе лә рассадниктарҙа. Эш бына тик ерҙә генә.

Быйыл уның звеноһында тик ҡыҙҙар ғына. Йәш кенә 8 ҡыҙ. Уларҙы ул хәҙер уҡ үҙе кеүек эшләргә өйрәтә башланы. Был звено биш гектар йәшелсә, 2 гектар киндер сәсергә тейеш.

Баҡса майҙанының ҡалҡыуыраҡ урындары һыу аҫтында түгел. Мәһинур апай бер нисә урындан ерҙе ҡулы менән соҡоп ҡараны. Дымлы ҡара тупраҡты ҡулына алып, ҡыҫып йомарланы, шунан таратып, еҫкәп ҡараны, тағы йомарланы. Тупраҡты ташлап, устарын һыпып, ҡулын таҙартҡан килеш: «Иртәгә, был урындарҙы һөрә башларға мөмкин» тип ҡуйҙы. Ҡап-ҡара ергә текәлеп, оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо. Буласаҡ көҙгө баҡса уның күҙ алдына килде. Ул үҫкән йәшелсәләрҙе күрә кеүек. Бына ҡултыҡҡа һыймаҫлыҡ кәбеҫтәләр бер гектар ерҙе ҡаплаған, икенсе гектарҙа эре ҡыҙыл сөгөлдөрҙәр үҫәләр, өсөнсө гектарҙа кишер, шалҡан. Әнә эре-эре, тәмле ҡауындар тәгәрәп яталар. Нәм-йәшел ҡыярҙар, һабағында уҡ ҡыҙара башлаған эре помидорҙар, баштары тауыҡ йомортҡаһы ҙурлыҡ мәктәр ярты гектарҙан артығыраҡ ерҙе ҡаплаған. Көҙгө йәшелсә баҡсаһы уның күҙ алдында шулай ҡалҡыулана һәм ул шулай буласаҡ та, Мәһинур апай булмаҫлыҡ нәмә тураһында һөйләмәй. Ул була тип әйтһә, үтәлә: күп ваҡытта артығы менән үтәлә. Быйыл ул яҡшы йәшелсә баҡсаһы булдырырға йөкләмә алды. Колхозға иң кәмендә 12 мең һум доход бирергә вәғәҙә итте һәм ул уны артығы менән үтәйәсәк. Ҡыуыш яһарға урын билдәләне. Ул үҙенең ҡыҙҙары менән йәй көндәрендә ошо Өсән йылғаһы буйында ҡуна ятып эшләйәсәк. Иртәгә звеноһы менән бында буласаҡ.

Мәһинур апай тәбиғәтте бик ярата. Бына ул һоҡланып тирә-яҡҡа ҡарап тора. Ул уйлай: тиҙҙән ҡайындар япраҡ ярыр. Уның өсөн йәшәүҙең иң матур сағы ҡайындар япраҡ ярған ваҡыт. Аҡ ҡайындар япраҡ ярған саҡта, йөрәктә лә нәмәләр япраҡ яра төҫлө. Дәртме ул, көсмө, йәшәү теләгенен тағы ла ныҡыраҡ көсәйеүеме, нәмәләр бар инде. Таң атҡанда Өсән таллығында һандуғастар һайрар. Уларға ҡушылып ҡыҙҙар йырлар. Һыу йылыныуҡас, ҡыҙҙар сырылдашып һыу инерҙәр, һәм йырлай-йырлай эшләрҙәр. Бына ниндәй күңелле буласаҡ. Мәһинур апай шундай шатлыҡлы уйҙар менән йылмайып: «Донъя ниндәй гүзәл...» — тип ҡуйҙы һәм боролоп ауыл яғына табан атланы.

Ҡайтып еткәс, ул өйөнә инмәне, тап-тура үҙенең рассадниктарына яныша китте. Унда ҡыҙҙар йырлай-йырлай эшләйҙәр ине.

Ҡадир Даян.

Әҙерләнгән ағастарҙы яңы биш йыллыҡ төҙөлөштәренә тиҙерәк илтеп еткерергә

Һал ағыҙыуҙың тәүге көндәре

Быйыл һал ағыҙыу эше айырыуса ҡыйын шарттарҙа үткәрелә. Апрель урталарында ирә башлаған ҡар, унан һуң башланған һыуыҡтар менән оҙаҡ ятты. Тәүге ташҡын кәмене, айырым йылғаларҙа апрель аҙағына тиклем боҙ китмәй торҙо. Шуның арҡаһында һал ағыҙыу эшен йәйелдереп ебәрергә мөмкинлек булманы. Юрюҙән леспромхозы 17 апрелдә Ҡошелевкә йылғаһында ҡыуғын эшен башлаһа ла, ваҡытлыса туҡтатып торорға мәжбүр булды, сөнки Юрюҙән йылғаһында боҙ китмәгәйне.

Һуңғы аҙнала көндәрҙең бик ныҡ йылыныуы күп йылғаларҙа ағастарҙы ҡыуғын менән ағыҙырға мөмкинлек бирҙе. Ләкин тағы ла икенсе ҡыйынлыҡ килеп тыуҙы. Бөтә йылғалар ҙа ҡапыл шул тиклем ныҡ ташты, улар күп урында ярҙарҙан ашып сыҡтылар. Бишенсе майҙа Ағиҙелдең юғары ағымында һыу алты метрға артты, һәм ярҙан ашып сығып Бөрйән районының үҙәге Иҫке-Собханғол ауылына таралды. Тюне-Озер леспромхозы тәҙәттә Тюне йылғаһынан һыуҙың тәрәнлеге ике метр кимәлдә булған саҡта ағастарҙы ҡыуғын менән ағыҙа торғайны. Ә алтынсы майҙа был йылғала һыу 4,2 метрға күтәрелде. Һаллауға әҙерләнгән ағас штабелдәре һыу аҫтында ҡалды.

Йылғаларҙа ташҡындың хисабеүе тиҙ һәм энергиялы эшләүҙе талап итә. Күп урындарҙа шулай эшләйҙәр ҙә. Әүжән леспромхозы Ҡаға һәм Әүжән йылғаларына 15 мең кубометр ағас төшөрҙө. Хәҙер улар запанға киләләр. Юрюҙән леспромхозы беренсе майға 12 мең кубометр ағасты ҡыуғын менән ағыҙыуҙы тамамланы һәм улар запан аша Юрюҙән йылғаһына — һалға бәйләү урынына үткәрелде.

Бөрйән, Ҡариҙел, Танып һәм Нуриман леспромхоздары ла икенсе һәм өсөнсө майҙа йылғаларға ағас төшөрә башланылар. Нуримандылар Шәрварка йылғаһында ике мең кубометр ағасты ике көн эсендә ағыҙып бөттө. Леспромхоз һәм сплавконтораның эшселәре ең һыҙғанып эшләйҙәр. Нуриман леспромхозының Чандар участкаһы (начальнигы иптәш Ганов) эшселәре һал ағыҙыуға бөрҙәм һәм ойошҡан рәүештә сыҡтылар. Һөҙөмтәлә йылғаға ағастарҙы төшөрөү эше бер көн эсендә тамамланды. Ләкин Сарва һәм Һалдыбаш йылғаларында көслө ташҡын эште йәйелдерергә мөмкинлек бирмәй әле.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, тәүге көндәрҙә серьеҙ етешһеҙлектәр ҙә күп. Танып леспромхозы (директоры иптәш Дергунов) 29 мең кубометр ағасты 300 кашма — ваҡ һалдар менән Танып йылғаһына төшөрҙө. Ләкин уларҙы йылғанан нормаль ағыҙыу эшен ойошторманы. Һөҙөмтәлә улар Алғыш пристаненә килеп тығылдылар. Леспромхоз етәкселәре заторҙы бөтөрөү өсөн Тәтешле, Балтач райондарынан ярҙам һорау урынына Өфөнән катер ебәреүҙе талап итәләр.

Ағиҙел пароходствоһы, үткән йылдағы кеүек, һалдарҙы килтереүҙә тәүге көндәрҙә үк аварияға юл ҡуя. Юрюҙән һал ағыҙыу конторанынан ҡабул ителгән 5 мең кубометр ағасты Ҡариҙелдән Черниковск фанера камбинатына килтергәндә аварияға осраны. Һөҙөмтәлә мең кубометр ағас таралып, ағып китте. Сөнки «Барнаул» һәм «Комсомольск» пароходтарының командалары һалдарҙы тәндә йөрөтөүгә тейешенсә әҙерләнмәгәндәр.

Ошондай яуаплы осорҙа эш менән оператив етәкселек, тиҙ хәрәкәт итеү кәрәк ине. Ләкин «Башлесосплав» тресы һәм БАССР Урман промышленносе Министерствоһы етәкселәре күп леспромхоздарҙағы һәм сплавконтораларҙағы ысын хәлде белмәйҙәр, эштең иң яуаплы, көндең һәр бер сәғәте ҡиммәт булған осорҙа оператив етәкселек, эшлекле ярҙамды тәьмин итергә, һал ағыҙыуҙы юғалтыуһыҙ үткәрергә кәрәк.

Н. Ртищев.

Мең кубометрҙан артыҡ утын оҙатылды

Байрам көнө алдынан ине. Сим йылғаһының ағас тейәү пунктына утын алырға тәүге баркастар килеп туҡтаны. Был хәбәр леспромхоздың Урман участкаһына ишетелеү менән үк автогараждың һәм урман складының эшселәре —йөк тейәүселәре байрамды хеҙмәт менән билдәләү маҡсатында, баркастарға утын тейәшергә ярҙамға барырға булдылар.

50 кеше төндә юлға сыҡты һәм 30 километр араны йәйәү үтеп, иртәнге сәғәт 8 тирәндә «Пятилетка» участкаһында инеләр инде. Энтузиастар ял итеп тормайынса, иртәнге аштан һуң уҡ эшкә тотондолар.

Шулай итеп улар тәүге өс көн эсендә республикабыҙҙың башҡалаһы өсөн өс баркасҡа мең кубометрҙан артығыраҡ утын тейәп оҙаттылар.

Һәм хәҙер ҙә Урман участкаһының утын тейәүсе эшселәре юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге күрһәтәләр. Улар Еңеү көнөн дә хеҙмәттә яңы уңыштар менән ҡаршылайҙар. К. Закиров З. Нуриманов, М. Захаренко, А. Кәлимуллин, П. Стороженко һәм башҡа иптәштәр тейәүҙә көнөнә бер ярым-икешәр норма бирәләр.

М. Саниев,

Оло-Тилек леспромхозының рабочком председателе.

Һыуғын ойошҡан рәүештә башланды

ҠАРИҘЕЛ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Абыз һал ағыҙыу участкаһында (начальнигы иптәш Выгузов) йылғалар боҙҙан таҙарыу менән ҡыуыу эш башланды. Бағорҙар менән ҡоралланған 28—30-лап эшсе тандан алып киске ҡараңғыға тиклем эшләй. Улар йылға буйҙарындағы ағасты йылғаға төшөрәләр, ҡыуғын менән ағыҙалар. 4 майҙа бер көн эсендә 8000 кубометрҙан артыҡ ағас йылғаға төшөрөлдө. Эшсе Зия Йосопов бер үҙе 45 урынына 800 кубометр ағас төшөрҙө. М. Рәфиков, Ш. Әхиева, М. Садыков иптәштәр көндәлек нормаларын 150—170 процентҡа үтәнеләр.

Комсомол участкаһының ҡыуғынсылары бер көндә ике мең кубометр ағас ағыҙҙылар. Ҡариҙел леспромхозының эшселәре ҡыуғын планын срогынан алда тамамлау өсөн көрәшәләр.

— Көндөң яҡшы тороуы эшебеҙҙе ҡыҫҡа срокта башҡарып сығыуға мөмкинлек бирә, — ти техноруҡ иптәш Бриллиантов.

Бөтә участкаларҙа ла эш таңдан алып төнгә тиклем дауам итә. 600 һалсы көнөнә дүрт тапҡыр йылы аш алалар.

Ҡариҙел леспромхозында ла ҡыуғын башланды.

Ғ. Исмәғилов.

Өфөгә беренсе һал килде

Быйылғы һал ағыҙыу навигацияһында беренсе булараҡ, 6 майҙа, Юрюҙән йылғаһы буйлап Өфө пристаненә 14 мең дана шпал тейәлгән һал килде. Улар тимер юлы өсөн билдәләнгәндәр. Һалды Өфө һал ағыҙыу транспорт конторaһының иң яҡшы капитандары Василий Стрельников һәм Андрей Захаров иптәштәр булған ике катер тағып алып килде.

Юлда ҙур ҡыйынлыҡтар ҙа булды. Ҡариҙел йылғаһының ныҡ ташҡын ваҡыты, хәүефле урындарҙың күп булыуы, һал ағыҙыусыларҙан айырыуса яуаплылыҡ талап итте. Рулдә бер яҡҡа аҙ ғына янылыш борҙоммо — һалды тараттың һәм мең ярым кубометр ҡиммәтле төҙөлөш материалын юғалттың, тигән һүҙ.

Бында катер командаларына йылғаларҙа йөрөүҙең күп йыллыҡ тәжрибәләре, эшкә намыҫлы ҡарауҙары ярҙам итте. Улар йөрөгән йылғаларының бөтә үҙенсәлектәрен яҡшы беләләр. Командалар берҙәмлек, ойошҡанлыҡ менән эшләнеләр.

Һал Ҡариҙел районынан Өфөгә рекордлы ҡыҫҡа срок эсендә — 3 көндә килтерен еткерелде һәм юлда бер генә авария ваҡиғаһына ла осраманы.

Һал ағыҙыусылар, совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышында дошманды Еңеү көнөн — 9 майҙы навигация сезонында тәүге һалды беренсе булып, килтереү менән билдәләнеләр.

В. Евдокимов.



Һүрәттә: Ағиҙелдә пассажир йөрөтөү пароходтары йөрөй башланылар. **Л. Якубов фотоһы.**

Көн дә телефон шалтырай...

Кабинетына ингәс тә Рәфиков өҫтәл артындағы урынына ултырмай, гәзәтенсә, тәҙрә ҡаршыһына килеп баҫа, иркенләп, махорҡаһын һыуыра-һыуыра ла, унан һуң күреңеп торған «Кәжәгәр» тауына ҡарап, һулыш алып ҡуя. Культура-ағартыу бүлеге инспекторы Мефтаховаға:

— Ҡара әле, Разия, тағы ла яҙ булды бит: оҙаҡламай йәй ҙә килер, күҙ булыр, унан һуң тағы ла ҡыш булыр. Шулай итеп, ошо кабинетта ултырып ғүмер ҙә үтеп китер...

Бәлки Рәфиков айҙар буйына кабинетында ултырып, ялҡып китә торғандыр, булмаһа был уйын бер кем дә аңлай алмай торған үҙенә генә хас үкенеү тойғоһолор, йәки улай ҙа түгелдер, ләкин ул һәр ваҡыт шулай, ти.

Дөрөҫ, Рәфиковҡа бик күңелһеҙ. Ул ни эшләргә белмәй бер аҙ ултыра ла, йөрөп килә, тәмәке тарта, ултыра, тороп тағы йөрөп килә, тағы ултыра, тағы тарта... Ултырып та, йөрөп тә, тартып та ялыҡҡас, телефонға тотона.

— Алло, почтамы? Миңә Ыланлыны алып бирегеҙ әле.

— Юҡ, һеҙ миңә үҙегеҙ алып бирегеҙ, был культура-ағартыу бүлеге мөдире Рәфиков. — Үҙенә-үҙе ҡәнәғәт һәм эшлекле тауыш менән әйтә ул был һүҙҙәрҙе.

— Ыланлымы, кем тыңлай?

— Иптәш... рәхим итеп, беҙҙең Сәләховҡа әйтегеҙ әле, (Сәләхов «Ыланлы» ауыл библиотекаһы мөдире) ул яҙғы сәсеүгә эш планы төҙөһөн, юҡһа яҙ килде, «Кәжәгәр» һыртында ҡар ҙа иреп бөттө инде, әйтмәһәң ул онотоп та ҡуя торған. Беҙгә ай аҙағында отчетын бирергә лә онотмаһын.

Унан һуң Рәфиков Арслан, Лауҙе, Дүшәмбикә һәм башҡа ауыл Советтарен саҡыра. Уҡыу өйө, клуб һәм библиотека мөдирҙәрен сәсеүгә «әҙерләкерга» ҡуша.

Сәғәт алты тула, ул эштән ҡайта. Иртән тутыҙҙа килә һәм тағы ла, кисәге кеүек, эш дауам итә.

Район колхоздарында 24 клуб, 13 уҡыу өйө һәм 9 ҡыҙыл мөйөш бар, ә ауылдарҙа ике библиотекала телефон булмаһа, Ҡыйғы район Советы культура-ағартыу бүлеге нисек эшләр ине икән? Күптән түгел булып үҙған район партия активе йыйылышында коммунистар культура-ағартыу эшенең бик насар тороуын тәнҡитләнеләр, бында Рәфиков һәм Мефтахова иптәштәр ҙә ҡатнаштылар, ләкин был уларға тәьҫир итмәгән, күрәһең.

Уҡыу өйҙәре, клубтарҙың һәм библиотекаларҙың сәсеү осорова эш пландары юҡ, стена газеталары һәм «боевой листоктар» сығарыуға әҙерлек алып барылмай. Колхоздарҙа 12 радиоприемник бар, ләкин уларҙың икеһе генә төҙөк. Район үҙәге библиотекаһы (мөдире иптәш Ибраһимова) яҙғы сәсеү осоронда 10—15 күсмә библиотека ойоштторорға тейеш, ләкин ул был эшкә тотонмаған әле. Колхоздарҙа музыкаль инструменттар юҡ, булғандары ла ватылып бөткән.

Атап әйткәндә, райсоветтең культура-ағартыу бүлегендә эшләүсе иптәштәр эшһеҙлек күрһәтәләр, ә райсовет һәм райком етәкселәре уларҙан үҙ эштәрен намыҫ менән башҡарыуҙы талап итмәйҙәр.

Нур Ғәлимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Йәш таланттар сәхнәлә

Ошо көндәрҙә театраль училищене тамамлаусы студенттар тарафынан Мольерҙең «Тартюф» пьесаһы сәхнәлә ҡуйылды. (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисе Р. Фәйзи постановкаһы).

Спектаклдә тамашасылар үтә ҡыҙыҡһыныу менән ҡаранылар. Был сығыш искусствоға өмәтле йәш таланттар килеүе тураһында һөйләй.

Уйнаусыларҙың ныҡышмалы әҙерләнгәнлектәре күренеп тора. Бигерәк тә Мирзаһитов (Тартюф), Ғәрипов (Оргон), Ирмәкимова, Ибраһимова, Әюпов, Нәзиров, Ғилажев, Вәлиева, Селиванова иптәштәр ролдәрен уңышлы башҡаралар.

Ф. Иҫәнголов.

Красноусол курорт[ы] дауалау сезонына әҙер түгел

Красноусол больнеологик курорт[ын]ында быйылғы дауалау [сезоны]нда ҡоҡкалар һаны[н] [үткән] йылға ҡарағанда, ике тапҡыр арттырыу күҙҙә тотола, [...] быйылғы сезонда койка-[көн]дәрен 12.500-гә һәм килеп дауа[ла]нып ыусылар һанын 800 кешегә [...] кереү планлаштырыла. Ләкин [ку]рорт дауалау сезонына әҙер [тү]гел.

Дауаланыу сезонына күп [ваҡыт] ҡалманы инде. Ауырыуҙар [...] һыу-балсыҡ менән дауа[ланыу] урыны йылы булырға тейеш[...] кин ул әле һаман әҙерләнмә[гән].

Дауалау йорттарына ла ремо[нт] эштәре тамамланмаған әле. [...] дауалау корпусын төҙөү эше [...] аҡрын темп менән бара, [...] средстволары тулыһы менән [фай]даланылмай. Курорттың ашханаһы бөтөнләй ташландыҡ хәлдә. [...] йөстәрҙе яңынан һалыу, тәр[...] өсөн кирбестәр, тәҙрәләргә [...] га быялалар юҡ. Һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорт[тар] управлениеһе начальнигы иптәш Козлов төҙөлөш материалдары алыуға ярҙам итмәй, курорттың транспорт средстволары ялы[...] томашинаһы ла эшләмәй, был [...] капиталь ремонт талап итеп[...].

Красноусол курортындағы б[...] дай хәлгә килешеп ҡарау [...] мөмкин түгел. Рафури районы [Со]вете башҡарма комитете л[а], [...] лай уҡ, Һаулыҡ һаҡлау Мин[ис]терствоһы ла тиҙ көндәр эсен[дә] дауаланыусылар килгәнгә т[иклем] курортты тулыһы менән әҙ[ерләп] халҡа килтереүҙе топ бурыстар[ы]... берәһе итеп иҫәпләргә тейеш.

Р. Ҡолмөхәмәтов.

Өсән йылғаһында электр станция төҙөлә

Ҡандра районында Өсән йыл[ғ]аһында 180 киловатт көслегендә электр станция төҙөлә башлан[ды].

Был станция Өсән йылғаһы б[уй]ындағы Туҡай, Николаевка, Ба[л]тай, Кендек тамаҡ, Ҡандра [...] ауыл Советтарына ҡараған колхоз[дар]ҙы—бөтәһе 15 колхозды [хеҙ]мәтләндерәсәк. Ул 1500 колхоз[сы] йортон, мәктәптәрҙе, клуб, уҡы[у] өйҙәрен, башҡа общественны[й] учреждениеләрҙе һәм маҡсыл [...] фермаларын яҡтыртасаҡ. Был[дан] башҡа электр көсө менән 5 т[...] мән, 2 май эшкәртеү һәм бер т[...] та ярыу заводтары эшләйәсәк.

Хәҙер төҙөлөшкә әҙерлек эш[тә]ре башланды. Байтаҡ [...] ағас материалдар ташылды һ[әм] таш сығарылды.

Был эштә бигерәк тә «Ҡыҙ[ыл] өсән», «Өс ҡайын», «Ҡайын [...] һәм Чапаев исемендәге колх[оз]дар актив ҡатнашалар.

Яңы күпер һалынды

Тор йылғаһы Воскресен ра[йо]нын икегә бүлеп аға һәм ул й[ыл]ғаның уң яҡ ярына урынлашҡа[н] колхоздарға район үҙәге м[енән] бәйләнеш тотоуҙа бик ҙур [...] саулыҡ килтерә ине.

Райондың биш йыллыҡ пла[ны] буйынса Тор йылғаһы аша күп[ер] һалыу эше, үҙган йылдың к[...] дә, инженер Коновалов етәксе[ле]гендә башланғайны. Көсәрҙә [...] ле эш һөҙөмтәһендә был күп[ер] хәҙер төҙөлеп бөтөп эксплоата[ция]ға тапшырылды.

Яңы күпер күп колхоздарҙ[ың] район үҙәге һәм машина-трак[тор] станцияһы менән аралашыу юл[ын] 15—20 километрға ҡыҫҡарта.

—☆—

Шахмат чемпионат[ы]

10 майҙа Керес менән Смы[с]ловтың киселтерелгән парт[ия]һы уйналды. Оҙаҡҡа һуҙылмаған ят[...] рәштән һуң, 49 йөрөш яһаға[с] улар бер яҡтың да ота[...] менән уйынды тамамларға р[...] булдылар.

22 турҙан һуң матчта ҡат[на]шыусыларҙың хәле ошолай: Бот[ви]нниктең 17 мөмкинлектән—12,5, Смысловтың 18 мөмкинлектән — 9,5, Решевскийҙең 17 мөмкинлек[т]ән — 9, Керестең 18 мөмкинлектән — 9, Эйвенең 4 очкоһы бар.

(ТАСС).

Яуаплы редактор:

Г. В. ГУЗАИРОВ.

ВКП(б) Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан сығарыла торған «АГИТАТОР БЛОКНОТЫНЫҢ» 8-се номеры баҫылып сыҡты.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Палермо верфтәренең суднолар төҙөүсе эшселәре предприятиеләргә етәкселек итеүҙе үҙ ҡулдарына алдылар

РИМ, 9 май. (ТАСС). Газеталарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Палермо верфтәренең эшселәре предприятиеләргә етәкселек итеүҙе 6 майҙа үҙ ҡулдарына алдылар. Был, заказдарҙың күп булыуына ҡарамаҫтан, администрация эшселәрҙең бер өлөшөн эштән сығарыуға уңышһыҙ тырышҡандан һуң верфтәрҙе ябыу тураһында бойороҡ биреп предприятиенән киткәс башҡарылды.

Верфтәрҙе эшселәр алғандан һуң идара итеү эштәре «эске (профсоюз) комиссияһы» тарафынан башҡарыла. Эшселәр цехтарҙы, унда хужалар тарафынан ебәрелгән провокаторҙар ниәтһен өсөн, үҙҙәре һаҡлайҙар. Кисә эшселәр мөһим заказдарҙы үтәүҙе срогынан ике көн алда тамамланылар. Верфтәрҙең эштәре ойошҡан рәүештә һәм йәһәт темптарҙа бара.

Палермо хеҙмәт палатаһы һәм мөһим профсоюз етәкселәре верфтәрҙәге эшселәргә үҙҙәренең солидарлығын белдерҙеләр.

Греция демократтарын яҡлау өсөн Италия сенатында һорау

РИМ. 9 май. (ТАСС). Сенаттың киске ултырышында, 8 майҙа, председатель Бономиҙең ҡыҫҡа инеш телмәренән һуң халҡ демократик фронтының сенаторҙары Террачини, д«Онофрио һәм Гризолиа хөкүмәткә асығыс һорау бирҙеләр. Улар хөкүмәттән «Пьетро Тосканелли» пароходында килеүсе грек демократтарына, Италия конституцияһының принциптәренә ярашлы рәүештә, Италия территорияһында һыйыныу хоҡуғы биреләр, тигән ышандырыуҙы талап иттеләр. Был пароход Грецияға барыр өсөн 22 апрелдә Буэнос-Айрестан юлға сыҡты, ул Генуя һәм Неаполь порттарында туҡталырға тейеш. Уның бортында Аргентина хөкүмәте тарафынан һөрәлгән һәм Афины хөкүмәте ҡарамағына тапшырылырға тейеш булған бер төркөм грек демократтары бар.

Христиан демократтары һәм уларҙың союзниктәре оппозиция тарафынан бирелгән һорауҙарҙы тикшереүҙән баш тартырға тырыштылар. Ләкин Террачини, халҡ демократик фронты исеменән, хөкүмәт вәкиле министр Тупиниҙе һорауҙы ҡабул итергә һәм уны, һис киҫекмәҫтән, де Гаспериға бирергә мәжбүр итте.

Ултырыштан һуң Террачини етәкселегендәге сенаторҙар төркөмө — Пертини, Моле, Лонго, Паоллючи һәм Аччи де Гаспери янында булдылар һәм унан грек патриоттарын Грецияның монархистик-фашистик властәре ҡулына биреүҙе туҡтатыу өсөн асығыс саралар күреүҙе талап иттеләр.

КӨНЬЯҠ КОРЕЯЛА ҺАЙЛАУҘАР

НЬЮ-ЙОРК, 10 май (ТАСС). Америка хәбәрселәренең Сеулдан хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, бөгөн 7 сәғәттә Көньяҡ Кореяла «милли собраниегә һайлауҙар» башланды. Был «һайлауҙар» Американың оккупацион властәре бойороғо буйынса үткәрелә. Корея халҡына Америка командованиеһе тарафынан көсләп тағылған «һайлауҙарға» ҡаршы баш күтәрергә ынтылыуҙар ҡәтғи рәүештә баҫтырылалар. Һайлауҙарға ҡаршы тороусылар араһында күп һанда ҡулға алыуҙар үткәрелде. Күп кенә ҡалаларҙа массовый рәүештәге протест демонстрацияларын ойоштороуға ынтылыуҙар баҫтырылдылар. Демонстранттар менән полиция араһында бәрелештәр булды. Яраланыусылар һәм үлеүселәр бар.

Италия республикаһының президентен һайлауға ҡарата

РИМ, 10 май. (ТАСС). Депутаттар палатаһы һәм сенат республика президентен һайлау өсөн бөгөн берләшкән ултырышҡа йыйналдылар. Депутаттарҙың һәм сенаторҙарҙың исемләп, йәшерен тауыш биреүҙәре 3 сәғәт дауам итте. Тауыш биреүҙең беренсе туры түбәндәге һөҙөмтәләрҙе бирҙе: де Никола өсөн — 396, Сфорца өсөн — 358, Эйнауди өсөн — 20, Бономи өсөн — 10, Факкинетти өсөн — 10, Казати өсөн — 5 тауыш бирелде; 61 бюллетень тултырылмаған булып сыҡты, 15 депутат һәм сенатор — монархистар тауыш биреүҙә ҡатнашманылар.

Кандидаттарҙың береһе лә ике палатаның тауышының өстән ике өлөшөн 600 тауыш ала алмағанлыҡтан, тауышҡа ҡуйыуҙың икенсе туры билдәләнде. Был тур бөгөн кис буласаҡ.

Де Никола кандидатураһы өсөн халҡ демократик фронты вәкилдәре һәм сарагатсылар тауыш бирҙеләр. Халҡ демократик фронты вәкилдәре был ҡарарға үҙҙәренең парламент группаларының кисәге ултырышында килгәйнеләр. Христиан демократтары үҙ партияһы етәкселәренең талабы буйынса һәм шулай уҡ республиканецтар Сфорца өсөн тауыш бирергә официаль ҡарар ҡабул итеүҙәренә ҡарамаҫтан, уның кандидатураһы ике партияның ултырышта ҡатнашҡан депутаттар һанына ҡарағанда, 65 тауыш кәм йыйнаны.

Ултырыштан һуң де Гаспери асығыс рәүештә христиан демократияһы етәкселәренең уның парламент фракцияһы етәкселәре менән берлектәге ултырышын ҡарар ҡабул итеү өсөн саҡырҙы.

* * *

РИМ, 10 май, (ТАСС). Рим радиоһы үҙенең махсус тапшырыуында, депутаттар палатаһының һәм сенаттың Римдә бөгөн кис булған берләшкән ултырышында республика президентен һайлау маҡсатында икенсе тапҡыр тауыш биреү булды, тип хәбәр итә.

Ултырышта 867 депутат ҡатнашты, шуларҙан 858 депутат тауыш биреүҙә ҡатнашты.

Тауышҡа ҡуйылған кандидаттарҙан: Сфорца — 405 тауыш, де Никола 336 тауыш, башҡа 6 кандидат 49 тауыштан алып бер тауышҡа тиклем алдылар.

40 бюллетень тултырылмайынса бирелгән, 3 бюллетень дөрөҫ түгел тип табылды.

Кандидаттарҙың береһе лә тейешле булған бөтә тауыштарҙың өстән ике өлөшөн ала алмағанлыҡтан, президентте һайлау өсөн иртәгә иртә менән яңы ултырыш саҡырыласаҡ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 01742 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға
1948 йыл
№ 95
14 май
йома
Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВКП(б) Өлкә Комитетенда. Республика колхоздарында яҙғы сәсеүҙең барышы тураһында. (1-се бит).
Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде. (1-се бит).
Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы. (1-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата. (2-се бит).
ИЛЕБЕҘГӘ КӨНДӘН-КӨН КҮБЕРӘК НЕФТЬ БИРӘЙЕК!
М. Минасян. — Юғары наградаһы стахановсы хеҙмәт менән аҡлайбыҙ. И. Болдогоев. — Беренсе класс бораулау мастеры. (3-сө бит).
ЭКЗАМЕНДӘР АЛДЫНАН. М. Емасова. — Экзамендәргә һәм һынауҙарға ойошҡан рәүештә әҙерләргә. (3-сө бит).
Беҙҙең республика. (4-се бит).
ФЕЛЬЕТОН. Ғ. Әхмәти. — Иртәгә һуңға ҡалмаҫ инерһегеҙ... (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Иртә культуралар сәсеүҙе тиҙерәк тамамларға

Буденный исемендәге колхоз Янауыл районында беренсе булып иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы. Бойҙай, һоло, борсаҡ культуралары — бөтәһе 246 гектар, 8 эш көнөндә сәселде. Бынан тыш күп кенә майҙанда ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды һәм уның 80 гектары тырматылды. Хәҙер һуңғы культуралар өсөн тупраҡ әҙерләнә.

Был уңыштарға Буденный исемендәге колхоз члендәре нисек өлгәштеләр? Бының сере бик ябай: сәсеү яҡшы әҙерлек менән ҡаршыланды, бөтә көс — кешеләр, йәнле тартыу көстәре, машиналар баҫыуҙарға күсерелде һәм улар тулы файҙаланылдылар. Өлгөргән һәр бер участка һөрелә, тырматыла, сәселә барҙы. Юғары урожай өсөн көрәштә ҡыҫҡа сроктарҙың мөһимлеген аңлаған колхозсылар бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем эшләнеләр, көндәлек нормаларҙы арттырып үтәнеләр. Бөтә эштә сдельщина ҡулланылды, социалистик ярыш киң йәйелдерелде.

Яҙғы сәсеүҙә ошондай уҡ ойошҡанлыҡ һәм юғары темп менән бөтә колхоздар ҙа эшләй алалар һәм эшләргә тейештәр. Социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреү, 1948 йылда юғары урожай яулап алыу интерестәре сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатта үткәреү өсөн бөтә көстө туплауҙы һәм тулы файҙаланыуҙы талап итәләр.

Тоташ республика буйынса сәсеүҙең барышы ҡәнәғәтләнерлек түгел. Һабан ашлыҡ сәсеү планы 10 майға ни бары 14,4 процентҡа ғына үтәлде. Һуңғы биш көндә ҡыҫҡа ғына үҫеш биргән Туймазы, Баҡалы райондары менән бер үк шарттарҙа булған Шишмә, Бәләбәй, Бозаяҙ, Йәрмәкәй райондары пландарын 6—9 процентҡа ғына үтәнеләр. Йылайыр, Бөрйән, Матрай, Абзан, Нуриман райондары сәсеүҙе бигерәк аҡрын темп менән алып баралар. Уларҙа биш көнлөк үҫеш 3—5 проценттән артыҡ тәшкил итмәй.

Яҙғы сәсеү темпы түбән булыуының сәбәбе нәмәлә? Ни өсөн биш көнлөк графиктар үтәлмәй? Сөнки әле күп кенә колхоздарҙа, МТС-тарҙа, райондарҙа яҙғы сәсеүгә етәкселек йомшаҡ, талап ителгән ойошҡанлыҡ юҡ, төп көстәр эшкә ҡушылмағандар һәм тулы нагрузка менән файҙаланылмайҙар. Бының шулай икәнен бик күп районлар һәм МТС-тар миҫалында күрергә мөмкин. Бына Мәләүез районы. Ул яҙғы сәсеү планын 10 майға ни бары 12,8 процентҡа ғына үтәне. Бында бер генә гектар ҙа ер һөрмәгән һәм ашлыҡ сәсмәгән колхоздар бар. Мәләүез, Һуҡайлы һәм Ергән МТС-тарындағы тракторҙарҙың өстән бер өлөшө генә файҙаланыла, уларҙың тәүлек әйләнәһенә эшләүҙәре ойошторолмаған.

Ҡыйғы, Дүртөйлө һәм башҡа райондарҙан килгән сигналдар ҙа трактор паркының һәм башҡа көстәрҙең тулыһынса файҙаланылмауын күрһәтәләр. Байыш МТС-ының етәкселәре «сүсешлек» настроениеһенә бирелеп, күп кенә трактор бригадаларында эште туҡтатып торалар. Бында яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн саралар күрелмәй. Тракторҙарҙың эштәрен ике сменала ойоштороу тураһында МТС етәкселәре уйлап та ҡарамайҙар. Был хәл яҙғы сәсеүҙең һуҙылыу ҡурҡынысын тыуҙыра. Ләкин Әлшәй, Ҡыйғы, Дүртөйлө һәм артта барған башҡа райондарҙың етәкселәре яҙғы сәсеүҙә килеп тыуған өҙеклектә һәм тәүгә көндәрҙең етешһеҙлектәрен бөтөрөү өсөн ҡәнәғәтләнерлек саралар күрмәйҙәр. Һәр бер колхозда, һәр бер МТС-та булған көс иҫәпкә алынмай, уның нисек файҙаланылыуы өҫтөнән контроль бик насар, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн политик-массовый эштәр, социалистик ярыш тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылмаған.

Хәҙер иртә культуралар сәсеүҙең хәл иткес көндәре. Иң яҡшы агротехник сроктар үтеп бара. Юғары урожайҙың уңышын тәьмин итеү өсөн бөтә саралар менән баҫыу эштәренең темпын күтәрергә һәм сифатын яҡшыртырға кәрәк. Хеҙмәткә яраҡлы бөтә колхозсыларҙың сәсеүҙә ҡатнашыуҙары һәм көндәлек эш нормаларын үтәүҙәре тәьмин ителергә тейеш.

Республикабыҙҙың машина-трактор станцияларына бик яуаплы бурыстар йөкмәтелгән. Улар яҙғы сәсеүҙең уңышын хәл итергә тейештәр. Трактор паркын дөрөҫ файҙаланған саҡта ғына был маҡсатҡа өлгәшергә мөмкин. МТС етәкселәре, трактор бригадаларының бригадирҙары, бөтә трактористар колхозлар менән төҙөшкән договорҙы теүәл үтәү өсөн арымай-талмай эшләргә, сәсеү срогын ҡыҫҡартыу өсөн эшлекле саралар күрергә бурыслылар. Темп өсөн көрәшеү менән бер рәттән, алдынғы совет агротехника талаптарын тулы үтәүгә лә ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк.

Иртә культуралар сәсеүҙе артабан һуҙыуға юл ҡуйырға мөмкин түгел. Хәҙер һәр бер сәғәт ваҡыт ҡәҙерле. Беренсе нәүбәттә колхоздарҙа бөтә көс ни ҡиммәтле яҙғы бойҙай культураһын сәсеүҙе тамамлауға тупланырға тейеш. Тунға һөрөлгән, сиҙәм, күп йыллыҡ үлән сәселгән ерҙәрҙе яҙғы бойҙай өсөн бүлергә кәрәк. Көнбағыш, борсаҡ, һоло, күп йыллыҡ үлән һәм башҡа иртә культуралар сәсеүҙе лә бөтә саралар менән тиҙләтеү талап ителә. Тик шул шарттарҙа ғына һабан ашлыҡ культураларының юғары урожайы өсөн ышаныслы нигеҙ һалынасаҡ.

Иртә культуралар сәсеүҙе тамамлаусы алдынғы колхоздарҙың һаны көндән-көн арта. Уларҙың эштәре бөтә колхоздарҙа ла иң яҡшы көндәрҙә яҙғы сәсеүҙе теүәлләп сығырға бөтә мөмкинлектәрҙең булыуын күрһәтәләр. Ауыл хужалығы работниктарынан был мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланыу һәм баҫыу эштәренең темпын ҡырҡа күтәреү талап ителә. Партия, совет ойошмалары, ауыл хужалығы органдары яҙғы сәсеүгә етәкселекте яҡшыртырға һәм сталинсе өсөнсө биш йыллыҡтың яҙғы сәсеүенең уңышлы үткәрелеүен тәьмин итергә бурыслылар.

ВКП(б) Өлкә Комитетенда

РЕСПУБЛИКА КОЛХОЗДАРЫНДА ЯҘҒЫ СӘСЕҮҘЕҢ БАРЫШЫ ТУРАҺЫНДА

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, яҙғы сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта үткәреү мөмкинлеген биргән һауа торошоноң яҡшы булыуына ҡарамаҫтан, республиканың ҡайһы бер райондары баҫыу эштәрен түбән темп менән алып баралар, билдәләнгән биш көнлөк заданиелар үтәлмәй һәм иртә культуралар сәсеү өсөн иң яҡшы агротехник сроктар ҡулдан ысҡындырыла, тип билдәләне. 10 майға 6—10 процентҡа ғына үтәгән Бозаяҙ, Воскресен, Нөрмәкәй, Шишмә, Иглин, Бәләбәй, Ҡалтасы райондары яҙғы сәсеүҙе айырыуса түбән темп менән алып баралар.

Иң ҡыҫҡа срокта сәселергә тейеш булған яҙғы бойҙай сәсеүҙә ҡайһы бер райондарҙың артта ҡалыу фактын ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы бөтөнләй ҡуйылмаһыҙ эш, тип иҫәпләй. Был бөтөнләй элек яҙғы бойҙай сәсеү яғынан республикала һәр ҙә алдынғы булған, ә хәҙер күрше райондарына ҡарағанда номерҙан ҡалған Краснокам, Байҡыбаш, Дәүләкән, Бишбүләк, Белокатай һәм Покровка райондарына ҡайтып ҡала.

Күп райондар һәм бигерәк тә Ауырғазы, Архангель, Борай, Маҡар, Стәрлетамаҡ райондары үҙгән йылдарҙағы хаталарҙы ҡабатлайҙар; ул йылдарҙа майлы культуралар, шәкәр сөгөлдөрө һәм күп йыллыҡ үләндәр сәсеү эшен һуңғараҡ ҡалдырырға мөмкин, тип иҫәпләнелә ине. Был ошо культуралар сәсеүлегененең бер өлөшөнөң һәләк булыуына һәм уларҙың урожайын тулыһынса алып еткермәүгә килтерә ине.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы, сәсеү эштәренең түбән темпта булыуының төп сәбәптәренең береһе трактор паркын насар файҙаланыуҙа, тип билдәләй. Күп кенә МТС-тарҙа — Ергән, Һуҡайлы, Октябрь, Пугачев, Федоровка һәм башҡа ҡайһы бер МТС-тарҙа байтаҡ тракторҙар яҡтыртыу булмағанлыҡтан төндә эшләмәйҙәр. Яғыулыҡты ваҡытында килтереп еткермәү һәм һәр төрлө техник етешһеҙлектәр арҡаһында ла тракторҙар оҙаҡ ваҡыттар тик торалар. Мәҫәлән, Октябрь МТС-ында Шәрипов етәкселек иткән трактор бригадаһында яҙғылыҡты ваҡытында килтереп еткермәү арҡаһында, тракторҙар 6 сәғәт тик торҙолар. Ергән МТС-ында сәсеүҙең ваҡытында яҙғылыҡ етешмәү арҡаһында бер көнгә бер нисә трактор техник яҡтан төҙөк булмауы арҡаһында эштән сыҡты. Күп трактористар смена нормаларын үтәмәйҙәр, ә машина-трактор станцияларының етәкселәре был фактыларға килешеп ҡарайҙар һәм һәр бер тракторҙың смена нормаһын үтәүҙе тәьмин итерлек саралар күрмәйҙәр.

Тикшереү ошолайҙа күрһәтте — ҡайһы бер колхоздарҙа йәнле тартыу көстәрен тулы файҙаланыу эшләнмәй. Яҙғы сәсеү үткәреүгә әҙерлек алдынан элекке йылдарҙағы хаталарҙы ҡабатлау...

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы агрономдар тарафынан баҫыу эштәре сифатына контроль бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәҫлек тип таба. Шуның һөҙөмтәһендә бигерәк тә Мәләүез һәм Федоровка райондары колхоздарында яҙғы сәсеүҙә агротехниканы боҙоу фактылары бик күп. Ҡайһы бер агрономдар агротехниканы боҙоусыларға килешеп ҡарайҙар.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы үткәрелгән тикшереүҙәр нигеҙендә Мәләүез һәм Федоровка район партия комитеттәре яҙғы сәсеүҙә массовый-политик эште һис тә ҡәнәғәтләнерлек ойошторамағандарын билдәләй. Был райондарҙың күп трактористарҙы, колхозсылары һәм хатта трактор бригадалары, баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙары һәм шулай уҡ колхоз председателдәре СССР Верховный Советы Президиумының «Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгәнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙән, люцернаның һәм тимофеевканың юғары урожайын алған колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм уларҙы СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында» 1948 йыл 24 апрель Указы менән ошо көнгә тиклем таныштырылмағандар. Трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларына газеталар һәм журналдар таратылмай. Бүленгән агитаторҙар был бригадаларға бик һирәк баралар.

ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы **ҡарар итте:**

1. Республика колхоздарында яҙғы сәсеү темптары ҡәнәғәтләнерлек түгел һәм һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе агротехник сроктарҙа үткәреүгә ҡурҡыныс тыуҙыра, тип иҫәпләргә.

Иртә һабан ашлыҡ культураларын сәсеү сроктарының үтеү алдында тороуын иҫәпкә алып, БАССР ауыл хужалығы Министрлығынан, партия райкомдарынан һәм район Советы исполкомдарынан бөтә сәсеү эштәре темпын ҡырҡа көсәйтеүҙе һәм сәсеү, яҙғы һөрөү буйынса билдәләнгән биш көнлөк заданиене һис һүҙһеҙ үтәлеүен тәьмин итергә мәжбүр итергә. Шуның менән бергә яҙғы бойҙай, майлы культуралар, күп йыллыҡ үләндәр һәм шәкәр сөгөлдөрө сәсеүҙе яҡын өс көндә тамамлау өсөн был культураларҙы сәсеүҙе тиҙерәк үткәреүгә айырыуса иғтибар итергә.

2. БАССР ауыл хужалығы Министерствоһына, партия райкомдарына һәм район Советы исполкомдарына яҙғы сәсеүҙә агротехниканы боҙоу фактыларына юл ҡуймаҫҡа, сәсеү эшенең сифатына контроль эшендә агрономдарҙың яуаплылығын күтәрергә һәм яҙғы сәсеүҙә брак эшләүселәргә агрономдар тарафынан килешеп ҡарауҙы бөтөрергә тәҡдим итергә.

3. Ауыл хужалығы Министерствоһын, партия райкомдарын, район Советы исполкомдарын һәм МТС директорҙарын трактор паркын файҙаланыуҙа күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе ҡыҫҡа срокта бөтөрөргә, бөтә тракторҙарҙы ике сменала эшләүҙәрен һәм һәр бер трактористың смена нормаһын үтәүен тәьмин итеүҙе мәжбүр итергә.

Шуның менән бергә колхоздарҙа йәнле тартыу көстәрен файҙаланыуҙы тәртипкә һалырға, һис кешесеҙ эш аттарын, үгеҙҙәрҙе һәм һыйырҙарҙы икенсе дәрәжәле эштәргә ебәрмәҫкә, уларҙы сәсеү эштәренә ҡушырға.

4. ВКП(б) райкомдарына райондың бөтә етәксе партия һәм совет работниктарын трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаларында масовый-политик эштәрҙә актив ҡатнашырға тәьмин итергә һәм бөтә трактористтарға һәм колхозсыларға «Бойҙайҙан, арыштан, кукурузанан, дөгәнән, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙән, люцернаның һәм тимофеевканың юғары урожайын алған колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау тураһында» СССР Верховный Советы Президиумының 1948 йыл 24 апрель Указын аңлатырға тәҡдим итергә.

Яҙғы сәсеүҙә тәүге партия ойошмаларының һәм коммунистарҙың ойоштороусылыҡ ролдәрен күтәрергә, Коммунистар тракторҙа, сәскестә һәм һабанда үҙҙәренең юғары ырамлы эш өлгәләре менән бөтә колхозсыларҙы һәм трактористтарҙы яҙғы сәсеүҙе тиҙ үткәреүгә мобилизовать итергә тейештәр.

5. Мәләүез, Федоровка, Стәрлетамаҡ райондарының байтаҡ колхоздарында баҫыусылыҡ бригадаларында ойошторолған звеноларҙың ошо көнгә тиклем эшкә ҡушылмауҙарын һәм тарҡалыу алдында тороуҙарын билдәләп, партия райкомдарын, район Советы исполкомдарын колхоздарҙа звеноларҙың тороуын тикшереүҙе ойошторорға, уларҙы ойоштороу яғынан нығытыу сараларын күрергә һәм бер ҡандай ваҡиғала ла звеноларҙың тарҡалыуына юл ҡуймаҫҡа мәжбүр итергә.

Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы май айының икенсе биш көнлөгөндә яҙғы сәсеү барышының йомғаҡтарын ҡаранылар һәм социалистик ярышта еңеүсе түбәндәге райондарға БАССР Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бирергә ҡарар иттеләр:

Яҙғы сәсеү планын 32,9 процентҡа үтәгән һәм республикала беренсе урынды алған **Туймазы** районына (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Баранов, район Советы исполкомы председателе иптәш Абдуллин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Садиков);

Яҙғы сәсеү планын 22,1 процентҡа үтәгән һәм республикала икенсе урынды алған **Баҡалы** районына (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Чумаков, район Советы исполкомы председателе иптәш Филиппов, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Байгуш);

Яҙғы сәсеү планын 21,6 процентҡа үтәп, республикала өсөнсө урынды алған Ҡандра районына (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Зарипов, район Советы исполкомы председателе иптәш Мусин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Хәмитов).

Яҙғы сәсеү планын 20—21 процентҡа үтәгән Белорет, Бүздәк, Янауыл, Әлшәй райондары колхоздарының эше яҡшы, тип билдәләнде.

БАССР Министрҙәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы яҙғы һөрөү һәм сәсеүҙең биш көнлөк заданиеһен 109 процентҡа, яҙғы сәсеү планын 46,4 процентҡа үтәгән **Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозына** (директоры иптәш Симонов, партия ойошмаһы секретары иптәш Дмитриев) бирелде. Яҙғы сәсеү планын 36,2 процентҡа үтәгән «Шәтәк» совхозының эше яҡшы, тип билдәләнде.

Яҙғы сәсеүҙә алдынғыларға тиңләшергә

Пландан тыш

БАҠАЛЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районның колхоздары бер-бер артлы иртә культуралар сәсеүҙе тамамлайҙар. Яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә Сталин исемендәге артель члендәре (председателе иптәш Тажетдинов) айырыуса яҡшы ойошҡанлыҡ күрһәттеләр. Улар иртә культуралар сәсеүҙе 5 көн эсендә районда беренсе булып тамамланылар. 350 гектар сәсеү планың үтәгәндән һуң, колхозда пландан тыш 50 гектар бойҙай һәм борсаҡ сәселде. Эш сифатына айырыуса иғтибар бирелде, 22 гектар майҙанда сәсеү арҡылы-буй юл менән үткәрелде. Хәҙер һуңғы культуралар сәсеү өсөн тупраҡ әҙерләнә.

«Үрнәк», «Чат күл» ауыл хужалығы артелдәре лә иртә культуралар сәсеүҙе 11 майҙа тамамланылар.

Районның башҡа колхоздарында ла темп күтәрелә. Майҙың икенсе биш көнлөгөндә график буйынса 5 мең гектар урынына, 8500 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде, ул үткән йылдың ошо ваҡытына сәселгәнгә ҡарағанда 3500 гектарға артыҡ тигән һүҙ.

Х. Ғәлимов.

Хеҙмәт ойошторолмаған

АБЗАН. (Телефон аша). Районда баҫыу эштәре сиктән тыш аҡрын бара. Май айының тәүге яртыһы үтеп барыуға ҡарамаҫтан, 10 колхозда әле булһа сәсеүгә төшмәгәндәр. Район беренсе биш көнлөк графикте хурлыҡлы рәүештә өҙҙе. 8 майға ни бары 400 гектар ер һөрәлде һәм 300 гектар иртә культуралар сәселде.

Колхоздарҙа хеҙмәттең насар ойошторолоуы баҫыу эштәренең өҙәлеүенең төп сәбәбе булып тора. «Көрәш», «Ҡыҙыл Урал» һәм Фрунзе исемендәге колхоздарҙа эшкә һуң сығалар, иртә ҡайталар. Колхоз етәкселәре баҫыуҙа жүнә ятып эшләүҙе ойошторомайҙар. Бына шуның һөҙөмтәһендә был колхоздарҙа ни бары 15—20 гектар ашлыҡ сәселде.

Стаханов исемендәге колхозда баҫыуҙа эшләүселәр араһында индивидуаль сдельщина ҡулланылмай. Күпселек колхозсылар көндәлек эш нормаларын үтәмәйҙәр. «12 Октябрь» колхозында ла баҫыу эштәре бик һүлпән бара. Колхоз председателе Мырҙабулатов һәм партия ойошмаһы секретары Ҡылысбаев иптәштәр сәсеү темпын тиҙләтеү өсөн мөмкинлектәрҙе файҙаланмайҙар. 7 коммунистең береһе лә баҫыуҙа эшләмәй.

Абзан МТС-ы баҫыу эштәрен үткәреүҙә колхоздарға тейешле ярҙам күрһәтмәй. «Юлдаш» колхозына беркетелгән трактор, подшипникә төҙөк булмағанлыҡтан, бер аҙнанан бирле тик ултыра. Муйнаҡ ауыл Советындағы 8 колхозда 12 тракторҙан 5-еһе генә эшләй.

Тракторҙарҙың ватылыуы, насар эшләүе, механиктарҙың ярҙамы кәрәклеге тураһында МТС-ҡа көн һайын күп сигналдар килә. Ләкин МТС-тың механиктарынан Байназаров һәм Ваһапов иптәштәр трактор бригадаларының эшенә бер ниндәй ҙә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Күсмә мастерской ойошторолһа ла, ул МТС усадьбаһынан сыҡҡаны юҡ әле.

Трактор бригадаларында массовый политик эштәр тейешенсә ойошторолмаған. Күрһәткес таҡталары булдырылмаған, «боевой листоктар» сығарылмай, көндәлек эштәргә йомғаҡ яһалып торолмай.

К. Сафин.

Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 10 майына, процентарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән	Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән
1.	Туймазы	32,9	27	33.	Мәләүез	12,8	9
2.	Баҡалы	22,1	17	34.	Бишбүләк	12,3	12
3.	Ҡандра	21,6	21	35.	Ҡөйөргәҙе	12,3	10
4.	Бүздәк	21,5	16	36.	Учалы	12,3	23
5.	Белорет	21,1	24	37.	Покровка	12,2	12
6.	Стәрлетамаҡ	20,7	16	38.	Благовещен	11,9	10
7.	Янауыл	20,6	12	39.	Ҡалтасы	10,5	8
8.	Әлшәй	20,0	18	40.	Ғафури	10,2	8
9.	Илеш	19,0	18	41.	Ауырғазы	10,0	9
10.	Балтач	18,7	13,6	42.	Иглин	10,0	11
11.	Кушнаренко	18,5	13	43.	Байҡыбаш	9,9	14,2
12.	Өфө	18,1	17	44.	Нөрмәкәй	9,7	12
13.	Дүртөйлө	17,8	16	45.	Хәйбулла	9,7	16
14.	Әбйәлил	17,6	8	46.	Тәтешле	9,6	10
15.	Йомағужа	17,0	12	47.	Дыуан	9,3	15
16.	Ҡыйғы	16,6	27	48.	Зиянчура	9,3	10
17.	Благовар	16,4	19	49.	Күгәрсен	9,1	11
18.	Саҡмағош	16,1	14	50.	Асҡын	8,6	8,6
19.	Борай	16,0	14	51.	Ҡариҙел	8,6	10
20.	Бөрө	15,9	14	52.	Шишмә	8,6	9
21.	Шаран	15,9	11	53.	Оло-Тиләк	8,3	11
22.	Мишкә	15,6	11	54.	Белокатай	8,2	13
23.	Стәрлебаш	15,3	12	55.	Воскресен	7,1	5
24.	Салауат	15,1	19	56.	Нуриман	6,7	6
25.	Дәүләкән	15,0	18	57.	Бозаяҙ	6,6	6
26.	Архангель	14,6	10	58.	Мәсетле	6,6	14
27.	Маҡар	14,2	15	59.	Бәләбәй	6,4	8
28.	Миәкә	13,9	17	60.	Абзан	5,8	7
29.	Ҡырмыҫҡалы	13,7	10	61.	Матрай	5,3	9
30.	Баймаҡ	13,6	25	62.	Бөрйән	2,9	2
31.	Краснокам	13,5	11	63.	Йылайыр	1,2	3
32.	Федоровка	13,1	11				

Районда беренсе булып

ДҮРТӨЙЛӨ. (Телефон аша). «Иҙелбуй» колхозында ҙур байрам. Колхозсылар 10 майҙа районда беренсе булып иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар. Бөтәһе 295 гектар һабан ашлыҡ культуралары сәселде. Бойҙай сәсеү планы байтаҡ арттырылып үтәлде.

Район Советы депутаты иптәш Төхфәтуллин етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы ярышта беренселекте алды. Бөтә майҙанда ла сәсеү бары тик сәскестәр менән генә үткәрелде. Алдынғы колхозсыларҙан Батыров, Ғиләжев, Сәлимьянов иптәштәр сәскес менән көн һайын 8 гектар урынына 10—11 гектар ашлыҡ сәстеләр.

«Урал» һәм «Ағым» колхоздары ла иртә культуралар сәсеүҙе тамамлау алдындалар.

Ғ. Хөснәтдинов.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА



Советтар Союзы ҡалаларында. Ташкент. 1-се номерлы аяҡ кейемдәре фабрикаһы эшселәренең клубы. М. Ненсон фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

Рус география фәне тарихен пропагандалау

ЛЕНИНГРАД. (ТАСС). Бөтә Союз география обществоһы президиумы Ватан географияһы фәне тарихен пропагандалау буйынса саралар күреү тураһында ҡарар ҡабул итте. СССР Фәндәр Академияһының география институты менән бергә күренекле рус географтарының һәм тикшеренеүселәренең альбомын сығарырға ҡарар ителде. Урта мәктәптәр өсөн атаҡлы сәйәхәтселәр портреттарының серияларын сығарыласаҡ.

Арктиканы үҙләштереү тарихенә, Үҙәк Азияла һәм донъяның башҡа районларында рус географтарының тикшеренеүҙәренә арналған лекциялар циклдары ойошторола.

Халыҡҡа ағас материалдары һатыу

ТБИЛИСИ. (ТАСС). Грузияның сауҙа ойошмалары йорттарҙы һәм квартираларҙы ағымдағы ремонт үткәреүсе индивидуаль төҙөүселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә ҙур ярҙам күрһәтәләр. Тбилисиҙа, Сталинирҙа, Кутаисиҙа, Батумиҙа, Гориҙа һәм республиканың башҡа ҡалаларында ағас материалдарының киң ассортименты менән тәьмин ителгән ағас материалдары һатыусы складтар асылды. Бында төҙөлөш өсөн әҙер детальдәр — шкафтар, тәҙрә рамалары, ишек һәм тәҙрә яҡаулары, иҙән һәм түшәм таҡталары, бағаналар һәм бүрәнәләр һатып алырға мөмкин. Хәҙер төҙөлөш сезоны киң йәйелдерелеү айҡанлы ағас материалдары һатыу складтарына бик күп материалдар һәм әҙер детальдәр ебәрелә.

Илебеҙ баҫыуҙарында

Украинала яуған ямғырҙар уҡымы һәм ҡабан ашлыҡтары сәсеүселәргә үҫешенә яҡшы тәьҫир иттеләр. Көньяҡ районларҙа ярым баҡсаларҙа баҫыуҙарҙа эш башланды. Яровой культураларҙы сәсеү дауам итә. Ул, уҙған йылғы өсөн сроктарҙа 800 мең гектарҙа артығыраҡ сәселде. Украина колхоздары сәсеүселәрҙе сәсеүҙе тулыһынса тамамланылар.

* * *

Грузияла мамыҡ сәсеү тамамланды. Мамыҡсылар мамыҡ сәсеүлектәрен беренсе ҡат һуғара башланылар.

* * *

Калинин өлкәһенең мөнләгән колхоздары етен сәсеүҙе тамамланылар. Был культура буйынса, уҙған йылдың шул уҡ ваҡыты менән сағыштырғанда, 77 мең гектарға артығыраҡ сәселде.

* * *

Архангельск өлкәһендә бик ҡаты ямғырҙарҙан һуң көндәр йылына башланы. Уҡым ашлыҡтары йәшелләнде. Уларҙың торошо яҡшы. Бойҙай, арпа һәм һоло культураларының беренсе мең гектары сәселде.

Яҙғы төндәрҙең башланыуынан файҙаланып, трактор бригадалары тәүлек әйләнәһенә эшләйҙәр.

* * *

Саратов өлкәһе колхозсылары уҙыш ашлыҡтарын ҡеүәтле тәрбиәләү буйынса пландарҙы үтәнеләр. Ашлыҡтарҙы, уҙған йылға ҡарағанда, ике тапҡырға артығыраҡ майҙанда утарҙыла.

* * *

Смоленск өлкәһе колхоздары йыйым итен сәсеүҙе 20 мең гектарға артығыраҡ үтәнеләр. Етен сәсеүҙе бөткән майҙандың яртыһы етенлек һәм пектарҙарға сәселгән.

* * *

Бобруйск өлкәһе колхоздары ирта бөртөкле ашлыҡтар сәсеү планын сроктан алда үтәнеләр. Бөртөклө ашлыҡ, планда билдәләнгәнгә ҡарағанда, 2 мең гектарға артығыраҡ сәселде.

* * *

Белоруссияла урожай йыйнауға әҙерлек эштәре башланды. Бөтә урындарҙа ла комбайндарға, бесән сапҡыстарға, урғыс машиналарына ремонт үткәрелә. Склад биналары ремонтлана һәм орлоҡ киптергестәр төҙөлә.

Урал радиолалары

СВЕРДЛОВСК, (ТАСС). Свердловскиҙа төҙөлә торған радио заводы «Урал—48» маркалы беренсе радиоланы эшләп сығарҙы. Ул үҙенең яҡшы сифатлы һәм матур итеп биҙәлгән булыуы менән айырыла. Йыл аҙағына тиклем предприятие 5 мең радиола эшләп сығарасаҡ.

1948 йылдың апрелендә валовой продукция етештереү буйынса государство планын үтәү йомғаҡтары тураһында

СССР Госпланының Башҡорт АССР-ы буйынса уполномоченныйы белдереүе

1948 йылдың апрелендә Башҡорт АССР-ының бөтә промышленносендә валовой продукция етештереү планы 100,3 процентҡа үтәлде. Башҡорт АССР-ы промышленносенең валовой продукцияһы 1948 йылдың апрелендә, 1947 йылдың апреле менән сағыштырғанда, 16 процентҡа артты.

Валовой продукция буйынса планды 400-гә яҡын предприятие үтәне һәм арттырып үтәне, шул иҫәптән: «Туймазынефть» тресы, Белорет металлургия комбинаты, Белорет ҡорос-сымыҡ заводы, тау оборудованиеләре заводы, резина промышленносе заводы, яҙыу машиналары заводы, паровоздар ремонтлау заводы, судноларҙы ремонтлау заводы, Красноусол быяла заводы, 8 март исемендәге тегеү фабрикаһы, Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы, ҡамыт-ыңғырсаҡ фабрикаһы һәм башҡа күп кенә предприятиеләр планды үтәнеләр һәм арттырып үтәнеләр.

1948 йылдың апрель планын үтәмәүсе предприятиелар һанына: «Ишембайнефть» тресы, Стәрлетамаҡ станоктар төҙөү заводы, Белорет металлургия комбинатының ағас контораһы, Түбән-Троицк сукно фабрикаһы, 3-сө номерлы тегеү фабрикаһы, «Башмаслопром» тресы, витамин заводы һәм башҡалар инәләр.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ведомствоһында булған предприятиелар буйынса 1948 йылдың апрель планы 98 процентҡа үтәлде, шул иҫәптән: төҙөлөш материалдары промышленносе управлениеһы 123 процентҡа, урындағы промышленность Министерствоһы 103 процентҡа, еңел промышленность Министерствоһы 100 процентҡа, аҙыҡ промышленносе Министерствоһы 90 процентҡа, урман промышленносе Министерствоһы 90 процентҡа, урындағы промышленность управлениеһы 76 процентҡа үтәнеләр.

Промысловой кооперация апрель планын 102 процентҡа, инвалидтар кооперацияһы 78 процентҡа үтәне.

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата

4 майҙа Америка Ҡушма Штаттары илсеһе Смит әфәнде СССР Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов янына килде һәм, үҙ хөкүмәтенең ҡушыуы буйынса, уға белдереү тапшырҙы. Был белдереүҙә түбәндәгеләр әйтелә:

Үҙенең 1946 йылда Генералиссимус И. В. Сталин һәм В. М. Молотов менән үткәргән бесәдаһына һылтанып, Смит әфәнде, совет политикаһының тенденциялары менән тынысһыҙланған Европа илдәре бергәләп һәм АҠШ үҙара үҙҙәрен һаҡлау өсөн бергә туплаңдылар һәм ул илдәрҙе аяҡҡа баҫтырыуға һәм үҙ-үҙҙәрен обороналауға йүнәлтелгән был бергәләп үткәрелгән сараларҙа Ҡушма Штаттар үҙҙәренең ролдәрен уйнау ихтыяры менән тулылар, тип белдерҙе. Америка халҡының тынысһыҙланыуы һәм ихтыяры Совет Хөкүмәтенең Европаны аяҡҡа баҫтырыу программаһына ҡарата дошманлыҡ позицияһы күрһәтеүе айҡанлы көсәйҙе. Европаны аяҡҡа баҫтырыу программаһы үҙенең идеяһы менән кемгә лә булһа ҡурҡыныс тыуҙырмайынса, бергәләп эшләү нигеҙендә, аяҡҡа баҫтырыу эшендә Америка ярҙамын күрһәтеү сараһы ғына булып тора.

Совет Хөкүмәтенең йәки, күрәһең, уның контроле аҫтында булған политик группаларҙың хәрәкәттәре арҡаһында килеп тыуған хәл, шулай уҡ был хәрәкәттәргә башҡа илдәрҙең, шулай уҡ АҠШ-тың да ҡарашы, һис шикһеҙ, бик серьез характер алып тора.

Был айҡанлы АҠШ хөкүмәте, бер ниндәй ҙә аңлашылмаусылыҡтар булмаһын өсөн, уның фекеренсә, бик мөһим булған ҡайһы бер моменттарҙы әйтеп бирергә теләй.

1. Халыҡ-ара мәсьәләләрҙә Ҡушма Штаттарҙың политикаһы һуңғы ваҡыттарҙа етерлек тиклем асыҡ булды. Был политиканы Америка халҡының күпселеге яҡлай. Ул киләсәктә лә энергиялы рәүештә тормошҡа үткәреләсәк.

Эске политик фекерҙәр, мәҫәлән, киләсәк һайлауҙар, был политикаға бер ниндәй ҙә йоғонто яһамаясаҡ.

АҠШ хөкүмәтенә коммунистик ойошмаларҙың, Ҡушма Штаттарҙа тыуып килеүсе экономик кризис Америка политикаһының тиҙҙән үҙгәреүенә килтерәсәк, тигән ҡарашты төрлө урындарҙа пропагандалауҙары билдәле. Хатта был алдан фекер йөрөтөүҙә ныҡышмалы рәүештә тороусылар ҙа шуны аңларға тейештәр: экономик кризис АҠШ-тың төп производство көсөнә йәки АҠШ тышҡы политикаһы нигеҙендә ятыусы төп факторҙарға һис тә ҡағылмаясаҡ.

Хәҙерге халыҡ-ара хәл Ҡушма Штаттарҙың иминлегенә өсөн һәм дөйөм тыныслыҡ өсөн бик әһәмиәтле булған мәсьәләләргә ҡағыла.

2. АҠШ хөкүмәте Ҡушма Штаттарҙа Советтар Союзына ҡарата бер ниндәй ҙә дошманлыҡлы йәки агрессив уйҙар булмауы тураһында асыҡ итеп белдерергә теләй. Ҡушма Штаттарҙың политикаһы шулай итеп эшләнгән: әгәр ҙә Советтар Союзы үҙенең күршеләре менән тыныс йәшәргә ынтылһа һәм уларҙың эштәренә ҡарағанда артыҡ туранан-тура йәки ситләтеп йоғонто яһауҙан туҡталһа, АҠШ-тың был политикаһы Советтар Союзының интерестәренә һис тә насар йоғонто яһай алмай.

Ысынын әйткәндә, әгәр ҙә коммунистик әҙселек тарафынан власте баҫып алырға һәм сит ил интерестарына буйһондоролған режимдар урынлаштырырға ынтылыуҙарҙан илдәрҙең политик бәйһеҙлеген яҡлау маҡсатында Ҡушма Штаттарҙан башҡа илдәргә ярҙам күрһәтеү кәрәклеге булмаған булһа, Ҡушма Штаттар тышҡы политикаһының хәҙерге ваҡытта совет матбуғаты тарафынан ҡеҫкен ҡаршы килеүҙәр тыуҙырыусы күп кенә элементтәре, бер ваҡытта ла килеп тыумаған булыр ине. Әгәр ҙә был ынтылыуҙар туҡталһа, Ҡушма Штаттар тышҡы политикаһының ихтимал Мәскәүҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙырыусы ҡайһы бер күренештәренең кәрәклеге лә булмаҫ ине.

Америка-Совет мөнәсәбәттәренең хәҙерге хәле Америка халҡы өсөн һәм Ҡушма Штаттар хөкүмәте өсөн серьез күңел ҡайтыуҙың сығанағы булып тора. Беҙгә килгәндә иһә, был хәл беҙҙең өсөн ҡыйын һәм теләмәһәк ярҡыҙ нәмәне һайлау булып тора, быға беҙҙә Советтар Союзының һәм бөтә донъя коммунизменең политикаһы аҙым һайын этәрә килде. Беҙ ваҡиғаларҙағы шундай үҙгәрешкә, беҙгә үҙебеҙҙең ике илебеҙ араһында яҡшы һәм аҡыллы мөнәсәбәттәрҙе булдырыуға юл табырға һәм хәҙерге ваҡытта бөтә урында ла халыҡ-ара мөнәсәбәттәргә шул тиклем насар тәьҫир итеүсе көсөркәнешле хәлде тамырынан көсһөҙләндерергә мөмкинлек биреүсе үҙгәрешкә булған ышаныстан әлегә тиклем һис тә баш тартҡаныбыҙ юҡ әле. Ҡушма Штаттарға килгәндә, беҙҙең фекер айырымлыҡтарыбыҙҙы бөтә яҡлап тикшереү һәм регулировать итеү өсөн беҙҙең ишек һәр ваҡытта асыҡ.

Ҡушма Штаттар хөкүмәтенең бында яҙылған позицияһына ҡарата Совет Хөкүмәтенең члендәре кәмһетеп ҡараһаҡтар, тип минең хөкүмәтем ысын күңелдән ышана. Әгәр ҙә улар быны эшләйҙәр икән, совет халҡының иминлеге менән тулыһынса кредиты буласаҡ донъяла стабильный шарттар булдырыу эшенә беҙҙең үҙ вкладыбыҙҙы индерергә әҙер булыуыбыҙҙың һәм теләүебеҙҙең юҡлығына осрамаясаҡтар.

9 майҙа В. М. Молотов Смит әфәндене үҙенә саҡырҙы һәм Совет Хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса уға түбәндәге белдереүҙе яһаны:

Совет Хөкүмәте Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙерге хәленә ҡарата Америка илсеһе Смит әфәнденең ошо йылдың 4 майҙа яһаған белдереүе менән танышты. Совет Хөкүмәте АҠШ хөкүмәтенең был мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртырға теләүенә ҡарата был белдереүҙә әйтелгән фекергә ыңғай ҡарай һәм ошо маҡсатта беҙҙең арала йәшәүсе фекер айырымлыҡтарын тикшерергә һәм регулировать итергә башлау тураһындағы тәҡдим менән риза.

Шуның менән бергә Совет Хөкүмәте, СССР-ҙың Көнсығыш Европалағы политикаһы һәм бында Советтар Союзының йоғонтоһоноң көсәйеүе Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙер ҡәнәғәтләнмәслек хәлдә булыуының һәм халыҡ-ара хәлдең көсөркәнешле булыуының сәбәбе булып тора, тип АҠШ хөкүмәтенең белдереүе менән риза була алмауы тураһында белдереүҙе кәрәк тип һанай.

СССР-ҙың үҙе менән сиктәш булған, шулай уҡ Европалағы башҡа илдәр менән булған мөнәсәбәттәренә килгәндә, Совет Хөкүмәте, ысынлап та был мөнәсәбәттәр һуғыштан һуң байтаҡ яҡшырҙылар, тип ҡәнәғәтләнеү менән белдерә. Был, билдәле булғанынса, СССР һәм ошо илдәр араһында дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам тураһында договорҙар төҙөүҙә үҙенең күҙәлләнешен тапты. Был договорҙар Германияның һәм уның булыуы ихтимал булған союзниктарының агрессия ҡабатлауҙарына ғына ҡаршы йүнәлтелгәндәр. Был договорҙарҙың АҠШ-тың Мәскәүҙәге илсеһе Смит әфәндене белдереүенә ҡапма-ҡаршы булырлыҡ бер ниндәй ҙә йәшерен протоколдары юҡ. Үҙ территориялары аша Германия агрессияһы үткән ошо күрһәтелгән илдәр бындай договорҙарҙы төҙөү менән бигерәк тә ныҡ ҡыҙыҡһыналар. Америка Ҡушма Штаттарының да үҙенең сиктәш илдәре менән, мәҫәлән, Канада, Мексика, шулай уҡ Американың башҡа илдәре менән үҙҙәренең мөнәсәбәттәрен нығытыу политикаһын үткәргәнлеге билдәле. Был тулыһынса аңлайышлы. Советтар Союзының үҙе менән сиктәш һәм Европаның башҡа илдәре менән үҙ мөнәсәбәттәрен нығытыу политикаһын үткәргәнлеге лә шулай уҡ аңлашыла. Советтар Союзы Европаның был илдәре менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытыу политикаһын киләсәктә лә алып барасаҡ.

АҠШ хөкүмәтенең белдереүендә, Ҡушма Штаттарҙың башҡа илдәрҙә алып барған һәм СССР-ҙың ризаһыҙлығын тыуҙыра торған тышҡы политик саралары Советтар Союзының был илдәрҙең эске эштәренә артыҡ йоғонто яһауы менән аңлатыла, тип әйтелә. Совет Хөкүмәте бындай аңлатыу менән килешә алмай.

Был ваҡиғала күҙҙә тотолған Көнсығыш Европа илдәренә килгәндә, унда һуғыштан һуң, билдәле булғанынса, серьез демократик ҡайтанан ҡороуҙар булды; был ҡайтанан ҡороуҙар яңы һуғыш ҡурҡыныснан һаҡланыу юлы булып торалар һәм улар, шуға күрә, был илдәр менән СССР араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү өсөн яҡшы шарттар тыуҙырҙылар. Унда булған демократик ҡайтанан ҡороуҙарҙы Советтар Союзының был илдәрҙең эске эштәренә тығылыуы тип күрһәтеү бөтөнләй яңылыш булыр ине. Был, ошондай шикһеҙ фактыны — юғарыла күрһәтелгән ҡайтанан ҡороуҙар демократик көстәрҙең нацизм һәм фашизм өҫтөнән еңеп сығыуының тәбиғи һөҙөмтәһе булыуы һәм Көнсығыш Европа халыҡтары тарафынан яңы һуғыш ҡурҡыныснан ҡаршы гарантия итеп ҡаралыуы фактын һанға һуҡмау тигән һүҙ булыр ине. Был айҡанлы коммунистарҙы етәксе постарҙа урлатеү бик аңлашыла, сөнки был илдәрҙең халыҡтары коммунистарҙы яңы һуғышҡа ҡаршы иң эҙмә-эҙлекле көрәшеүселәр тип иҫәпләйҙәр.

Демократик ҡайтанан ҡороуҙар үткәреүҙең һәр бер государствоның эске эше булыуы тураһында бәхәсләшергә бер кемгә лә хоҡуҡ бирелмәгән. Ләкин, АҠШ хөкүмәтенең юғарыла күрһәтелгән белдереүенән АҠШ хөкүмәте икенсе төрлө ҡарашта икәнлеге һәм ул башҡа государстволарҙың эске эштәренә үҙенең тығылыуына юл ҡуя икәнлеге күренә, был Совет Хөкүмәтенең серьез ҡаршылығын тыуҙырмай ҡала алмай. Грецияларғы ваҡиғалар башҡа государстволарҙың эске эштәренә ошондай тығылыуҙың күп миҫалдарынан береһе булып тора.

Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙерге көндәге ҡәнәғәтләнмәслек торошон АҠШ хөкүмәте шулай уҡ Европаны аяҡҡа баҫтырыу программаһы тип аталған программа тураһындағы мәсьәләлә Совет Хөкүмәтенең тотҡан позицияһы менән аңлата. Шул уҡ ваҡытта әгәр ҙә Европа илдәрен экономик яҡтан аяҡҡа баҫтырыу тураһындағы мәсьәлә юғарыла күрһәтелгән программала эшләнгәнсә ҡуйылмайынса, Берләшкән Милләттәр ойошмаһы рамкалары эсендә халыҡ-ара экономик хеҙмәттәшлектең нормаль шарттары нигеҙендә һәм государстволарҙың милли хоҡуҡтарына һәм суверенитетына тейешенсә ихтирам итеү менән ҡуйылған булһа, ул ваҡытта СССР-ҙың Европаны аяҡҡа баҫтырыу программаһына ҡарата мөнәсәбәт итеүенә сәбәп булмаған булыр ине. Бигерәк тә СССР, һуғышта экономик яҡтан иң күп зарар күргән государстволарҙың береһе булғанлыҡтан, һуғыштан һуңғы халыҡ-ара экономик хеҙмәттәшлекте үҫтереү менән ныҡ ҡыҙыҡһына.

Шуның менән бергә, Совет Хөкүмәте ошоно белдерергә кәрәк тип иҫәпләй, Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙерге ҡәнәғәтләнмәслек торошо һәм халыҡ-ара хәлдең көсөркәнешле булыуы Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәтенең һуңғы осорҙағы политикаһының һөҙөмтәһе булып тора.

Ошондай көсөркәнешле хәлдең барлыҡҡа килеүенә бөтәһенән элек АҠШ хөкүмәтенең донъяның бөтә өлөштәрендә һәм, шул иҫәптән, СССР менән сиктәш территорияларҙа ла хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-авиация базаларының селтәрен әлләнә-әле күберәк үҫтереү көйөк аҙымдары ярҙам итә; шуның менән бергә, АҠШ-тың матбуғаты һәм уның күп кенә официаль вәкилдәре был базаларҙы булдырыуҙың маҡсаты СССР-ҙы ҡамап алыу тип туранан-тура белдерәләр. Бындай сараларҙы үҙ-үҙеңде обороналау интерестәре менән аңлатыу мөмкин түгел. Шулай уҡ СССР-ға ҡаршы йүнәлгән һәм АҠШ хөкүмәте менән тығыҙ рәүештә бәйләнгән билдәле круттарҙан сыға торған һәр төрлө һуғышсан яуҙар менән халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙең хәҙерге атмосфераһының ағыуланыуын да күрмәй үтеү мөмкин түгел. Быға ҡапма-ҡаршы рәүештә Совет Хөкүмәте АҠШ-ҡа һәм башҡа государстволарға ҡарата эҙмә-эҙлекле тыныслыҡ политикаһы алып бара, башҡа илдәрҙә һуғыш базалары төҙөмәй һәм кемгә лә булһа ҡарата ниндәй ҙә булһа яуҙар яһамай.

Унан ары, һуңғы ваҡытта Көнбайыш илдәрен Англияны, Францияны, Бельгияны, Голландияны, Люксембургты үҙ эсенә алған хәрби союзы төҙәлде. Советтар Союзының Көнсығыш Европа илдәре менән, шулай уҡ Англия һәм Франция менән үҙ-ара ярҙам тураһында төҙөлгән бөтә договорҙарының маҡсаты Германия тарафынан яңы агрессияға юл ҡуймауға йүнәлтелгән һәм ниндәй ҙә булһа союздаш государствоға ҡаршы йүнәлтелмәгән булыуға ҡарамаҫтан, хәҙер Көнбайыштағы биш государствонан төҙөлгән хәрби союз, договорҙан күренгәнсә, Германияны көҙгә тотоу менән генә ҡалмай, бәлки икенсе бөтә донъя һуғышында союздаш булған государстволарға ҡаршы ла бер үк дәрәжәлә йүнәлтелеүе мөмкин. Англияның, Францияның һәм Американың бөтә матбуғатында был союз СССР-ға ҡаршы йүнәлтелгән тип асыҡтан-асыҡ әйтелә. Шуның менән бергә, юғарыла күрһәтелгән хәрби союздың бары тик АҠШ хөкүмәте тарафынан күрһәтелгән яҡлаштырыуҙар арҡаһында ғына төҙөлгәнен әйтмәй үтеү мөмкин түгел. Көнбайыштағы биш государство араһында төҙөлгән хәрби договорҙы үҙ-үҙеңде обороналау договоры тип ҡарарға мөмкин түгел.

АҠШ хөкүмәтенең СССР-ға ҡарата тотҡан политикаһының дуҫтарса булмаған характеры Совет-Америка сауҙаһы өлкәһендә лә һиҙелә. Беҙҙең ике государство араһында төҙөлгән сауҙа килешеүе буйынса, АҠШ хөкүмәте Советтар Союзына АҠШ-тан тауарҙар сығарыуға ҡарата, һәр төрлө өсөнсө илгә ҡарата ҡулланыла торған ҡатмарлы ҡағиҙәләрҙе йәки формальностарҙың береһен дә ҡулланмаҫҡа бурыслы. Ләкин хәҙер АҠШ хөкүмәте тарафынан үткәрелә торған политика Ҡушма Штаттарҙың был йөкләмәһен һанға һуҡмай һәм, Советтар Союзының юғарыла күрһәтелгән килешеү буйынса үҙ йөкләмәләрен намыҫ менән үтәүенә ҡарамаҫтан, АҠШ-тың был политикаһы СССР-ға ҡарата дискриминация ҡулланып, Совет-Америка сауҙа мөнәсәбәтенә ҡапма-ҡаршы тора. Шуның һөҙөмтәһендә, Советтар Союзы тарафынан авансы түләнгән йәки, хатта, хаҡтары тулыһы менән түләнгән Америка тауарҙарын СССР-ға сығарыу өҙөлә, был шулай уҡ Американың тейешле фирмаларына ла зарар килтерә. Бындай хәлдең түҙеп торғоноҙ булыуы ап-асыҡ күренеп тора.

Хәҙерге ваҡытта АҠШ хөкүмәте Советтар Союзына ҡарата Ҡушма Штаттарҙың һис бер төрлө дошманлыҡ йәки агрессив ниәттәре юҡ тип белдерә һәм беҙҙең ике ил араһында яҡшы һәм аҡыллы мөнәсәбәттәр урынлаштырыу юлын табыу мөмкинлегенә һәм халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә көсөркәнешлектең тамырынан уҡ йомшартылыуына өлгәшеүгә ышаныуын белдерә һәм шулай уҡ донъяла совет халҡының иминлек интерестарына ла яуап бирерлек ныҡлы шарттар тыуҙырыуға булышлыҡ итергә әҙер булыуын белдерә.

Совет Хөкүмәте АҠШ хөкүмәтенең был белдереүен бары тик хуплай ғына ала, сөнки, билдәле булғанынса, ул Америка Ҡушма Штаттарына ҡарата һәр ваҡыт тыныслыҡ һәм хеҙмәттәшлек политикаһы алып барҙы, был политика СССР халыҡтары тарафынан берҙәм рәүештә хупланды һәм яҡлап ҡаршы алынды. СССР Хөкүмәте, үҙенең киләсәктә лә был политиканы тулыһынса эҙмә-эҙлекле рәүештә үткәрергә уйлауын белдерә.

Совет Хөкүмәте, шулай уҡ, булған ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөү һәм беҙҙең илдәр араһында, беҙҙең халыҡтарҙың интерестәрендә лә, шулай уҡ бөтә донъяла тыныслыҡты нығытыу эшендә лә яуап бирерлек яҡшы мөнәсәбәттәр урынлаштырыу юлын табыу мөмкинлегенә ышаныс белдерә.

Смит әфәнде Совет Хөкүмәтенең белдереүен АҠШ хөкүмәте иғтибарына еткерергә вәғәҙә итте.

(ТАСС).

СССР һәм АҠШ хөкүмәттәре араһында белдереүҙәр алышыу донъяның бөтә урындарында ла айырыуса ҙур иғтибар һәм ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршыланды

НЬЮ-ЙОРК, 11 май (ТАСС). Американың СССР-ҙағы илсеһе Смитт һәм СССР Сит ил Эштәре Министры Молотов араһында белдереүҙәр алышыу Ҡушма Штаттарҙа Америка матбуғатының һәм радиоһының бик ҙур ҡыҙыҡһыныуын һәм иғтибарын тыуҙырҙы.

Ассошиэйтед пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһе түбәндәгеләрҙе белдерҙе: «Американың официаль кешеләре, һаҡлыҡ менән, Молотовтың яуабы һуғыштан һуңғы ике ҙур антагонистең хәҙер йәшәп килгән фекер айырымлыҡтарын регулировать итеү тураһында һөйләшеүҙәр башларға әҙер булыуҙарын белдергәнлектәрен күрһәтә, тип билдәләнеләр».

Юнайтед пресс агентствоһы хәбәрсеһе Манниг, Берләшкән милләттәр ойошмаһындағы дипломаттар белдереүҙәр алышыуҙы «Берләшкән милләттәр ойошмаһы бынан ике йыл ярым элек Көнсығыш һәм Көнбайыш араһында һуғыш майҙаны булып әүерелгәндән һуң Мәскәү менән Вашингтон араһында беренсе серьез тыныс аҙым, тип ҡарайҙар. Ике бөйөк держава араһында һөйләшеүҙәр яғына булған көтөлмәгән боролош Берләшкән милләттәр ойошмаһының авторитетен һиҙелерлек рәүештә күтәреүгә килтерер ине. Ә быңың кәрәклеге һиҙелә, тип яҙа.

* * *

ЛОНДОН, 11 май (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Англия официаль круттарының вәкилдәре Советтар Союзының АҠШ менән тышҡы политик фекер айырымлыҡтарын тикшерергә теләүе тураһында 11 майҙа белдереүе айҡанлы һаҡлыҡ менән фекер йөрөтәләр.

Был круттарҙың ҡарашы официаль булмаған круттарҙың дөйөм фекеренә ҡаршы килә.

Англия сит ил эштәре министерствоһы вәкиле Американың 4 майҙа яһаған тәүге белдереүе тураһында Англияға информация яһалмаһы, тип хәбәр итте һәм Англияла АҠШ һәм Советтар Союзы араһындағы фекер алышыуҙарға комментарийҙар бирмәү тураһында инструкция бар, тип өҫтәне.

Дипломатик круттарҙа, был официаль тотанаҡлыҡты алып торған Совет-Америка һөйләшеүҙәре Германияның киләсәге тураһындағы мәсьәлә буйынса Лондон кәңәшмәһе ҡарарҙарын тормошҡа ашырыуҙы байтаҡ һуҙыуы ихтималы һәм һөйләшеүҙәр ваҡытында АҠШ хөкүмәтенең тактик яҡтан уңайһыҙ хәлдә ҡалыуы ихтимал булыуына тынысһыҙланыуы менән аңлаталар.

Илебеҙгә көндән-көн күберәк нефть бирәйек!



РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН НЕФТСЕЛӘРЕ

Һүрәттә: (һулдан уңға): **Ф. А. Алексеев, П. П. Балабанов** — «Туймазынефть» тресының бораулау мастерҙары, **М. И. Минасян** — ВКП(б) Үҙәк Комитетенең Өфө нефть эшкәртеү заводындағы парторгы, **И. П. Нифантов** — «Туймазынефть» тресының управляющие, **И. Р. Осадченко** — Өфө нефть эшкәртеү заводының директоры.

Л. Якубов фотоһы.

Юғары нinfrastructureаграданы стахановсы хеҙмәт менән акларбыҙ

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин совет халкы алдына Волга менән Урал араһында яңы нефть базаһын ойоштороу бурысын куйғайны. Большевиктәр партияһы тарафынан етәкселек ителгән һәм рухландырылған совет кешеләре юлбашсының был һүҙҙәрен тормошка ашырҙылар һәм конкретта «Икенсе Бакуҙы» барлыкка килтерҙеләр.

Беҙҙең Өфө нефть эшкәртеү заводы ла иптәш Сталиндең инициативаһы менән тыуҙырылды. Ул 1938 йылда хәрәкәт итеүсе предприятиелар сафына инде. Йәш совет гиганты үҙенең ун йыллык эше осоронда данлы үсеш юлын үтте. Ә киләсәге уның тағы ла гүзәлерәк буласак.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында өлгөлө эше өсөн заводка күп тапкырҙар бирелгән Государство Оборона Комитетенең күсмә Кыҙыл Байрағы мәңгегә һаклау өсөн ук[illegible] калдырылды. Һуғыштан һуңғы йылдарҙа коллективтең Ватан алдында күрһәткән данлы хеҙмәте өсөн завод СССР Верховный Советы Президиумының 1948 йыл 8 май Указы менән Ленин ордене алыуға лайыкты булды. Был, бөтә коллективтең ыңғайлы хеҙмәте менән яулап алынған награда.

Заводтың үтелгән үсеш юлы ике осорҙо — беренсеһе, уны үҙләштереүҙе, икенсеһе — артабан камиллаштереүҙе эсенә ала. Тәүге осорҙа юғары көкертлә нефтте эшкәртеүгә бәйләнештә күп кенә кыйынлыктар килеп тыуҙы. Был кыйынлыктар коллектив тарафынан хыйыу рәүештә еңелә барылдылар. Завод бигерәк тә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарының иң көсөркәнешле көндәрендә, фашистик илбаҫарҙар Кавказга — совет нефтененең үҙәгенә якынлашкан осорҙа, тулы үсешен алды һәм үҙенең биргән продукцияһы менән данлы армиябыҙға дошманды тар-мар итеү өсөн ярҙам итте.

Икенсе осор 1944 йылдарҙан башлана. Был вакытта инде коллектив техниканы артабан үҙләштереүҙе дауам иттерҙе һәм һоҡланғыс кадрҙар үсеп сыкты. Завод ышаныслы рәүештә алға табан ҙур үсеш алды. Быны түбәндәге мисалдан ук күреп була. Мәҫәлән, 1947 йылда бензин сығарыу, 1943 йыл менән сағыштырғанда, ике тапкырҙан күберәккә артты. Үткән йылда продукцияның үҙенә төшеү хакы ла байтак түбәнәйтелде, был государствоға 17 миллион һумдан артығырак файҙа биреүҙе тәьмин итте. Шуныһы айырыуса характерле, эшселәр һаны кыҫкартылған бер вакытта 1946 йылға карағанда үткән йыл продукция 33 процентка күберәк эшләп сығарылды.

Ағымдағы йылдың беренсе кварталында килеп тыуған кайһы бер кыйынлыктарға карамаҫтан, коллектив үткән йылдың ошо осороңа карағанда илебеҙгә ике тапкырҙан артык продукция бирҙе.

Был өлгәшеүҙәрҙе беҙҙең кадрҙарыбыҙ хәл иттеләр һәм хәл итәләр. Кадрҙар менән даими эш алып барыу, уларҙы политик тәрбиәләү, квалификацияларын күтәреү буйынса һәр вакыт хәстәрлек күреү, социалистик ярышты киң йәйелдереү коллективтең өлгәшеүҙәрен хәл итте. Заводтың партия ойошмалары [illegible] йәштәрҙе [illegible] тәрбиәләп үҫтерҙе. Уларҙың күптәре хәҙерге көндә инде етәксе эштәрҙә [illegible]. Мәҫәлән, заводта [illegible] В. П. Рябчиков [illegible] СССР Көнсығыш районында нефть промышленносы министрлығы [illegible]. Заводтың элекке баш механигы А. Д. Шеконин шул уҡ Министрлыктың [illegible] баш механигы, элекке мастер Р. А. Закиров Октябрьский кала Советы исполкомының председателе, элекке цех начальнигы И. Р. Осадченко хәҙер завод директоры булып эшләй башланы.

[illegible]

Алда бурыстар тағы ла ҙурырак. Коллектив илебеҙгә ағымдағы йылда, үткән йылға карағанда, 50 процентҡа күберәк продукция бирергә тейеш. [illegible]

Илебеҙ алға, коммунизмға кыйыу бара. Беҙҙең коллектив промелгәндәре менән генә тынысланып калмаҫак, ул Совет Хөкүмәтенең юғары наградаһына бишйыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн яңы хеҙмәт күтәрелеше менән яуап бирәсәк.

М. Минасян,
ВКП(б) Үҙәк Комитетенең Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводындағы парторгы.

Стахановсы вахталарҙа

СССР Верховный Советы Президиумы Указы менән беҙҙең «Туймазынефть» тресы Ленин ордене менән наградланды, ә беҙҙең бораулау мастеры И. Д. Куприяновҡа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Күп кенә алдынғы нефтселәребеҙ СССР ордендәре һәм миҙалдәре менән наградландылар. [illegible]

Партияның, хөкүмәттең һәм иптәш Сталиндең нефтселәр тураһындағы хәстәрлеген [illegible] промыселе коллективе эш темптарын тағы ла көсәйтте. [illegible] 9, 10 май көндәрендә пландан тыш [illegible] тонна нефть сығарҙык. [illegible] 5—7-шәр процент күберәк бирҙек.

Юғары награда алған [illegible] бригадалар 10 майҙан алып стахановсы вахталарға баҫтылар. Мастер Казаченко, Кондрашев, [illegible] участкалары [illegible] 107—110 процентка үтәй, [illegible]

Промыселдең нефтселәре [illegible] СССР Верховный Советы Президиумының 1948 йыл 8 май Указына арналған митингыла промыселдең коллективе йыллык нефть сығарыу планын срогынан алда үтәргә, илебеҙгә пландан тыш 25 мең тонна нефть бирергә карар итте һәм вағәҙәһен тормошка ашырыу өсөн көрәшә.

П. Андрианов,
ВКП(б) Үҙәк Комитетенең беренсе промыселдәге парторгы.

Экзамендәр алдынан

Экзамендәрҙе һәм һынауҙарҙы ойошкан рәүештә үткәрергә

Республикабыҙ мәктәптәрендә яуаплы осор — экзамендәр һәм һынауҙар осоро якынлаша.

Экзамендәр һәм һынауҙар мәктәп тормошонда һәм эшендә ҙур политик вәкиға булып тора. Ул — укыусыларҙың белемен тикшереү, мәктәптәрҙең һәм укытыусыларҙың йыллык эштәренә йомғак яһау. Экзамендәр укыусыларҙың фән нигеҙҙәрен нисек тәрән һәм нык үҙләштереүҙәрен, мәктәптең балаларҙа нисек коммунистик рух формировать итеүен, уларҙы совет патриотизмы рухында, Ленин — Сталин партияһына һәм совет государствоһына бирелгәнлек рухында нисек тәрбиәләүен күрһәтергә тейеш.

Экзамендәргә әҙерләнеү һәм уңышлы үткәреү мәктәптәр һәм мәғариф органдарының ғына эше түгел, был бөтә партия, комсомол, совет һәм бөтә общественный ойошмаларҙың иғтибары туплануы кимәтле буласак.

Үҙған йылда экзамендәр һәм һынауҙар вакытында байтак мәктәптәрҙә серьез хаталар һәм етешһеҙлектәр булғайны. Мәҫәлән, Бәләбәй калаһы мәктәптәрендә яҙма эш текстарын балаларға алдан ук бөлдерҙеләр.

Мәләүез районының Трясинский ете йыллык мәктәбе укытыусыһы иптәш Осипова экзамендәр алдынан балаларға әҙер задачаларҙы күсереп алырға биргән. Укыусыларҙың «шпаргалка» менән файҙаланыу фактылары ла юк түгел. Дүртөйлө районының Первомайск ете йыллык мәктәбендә тейешһеҙ юғары билдәләр куйғандар һ. б.

Мәғариф органдары, мәктәптәрҙең партия һәм комсомол ойошмалары быйыл бындай хаталарға юл куймаҫка, мәктәп эшен үҙ контролдәре аҫтына алырға, укытыу-тәрбиә эштәренең асылына тәрәнерәк төшөнөргә тейештәр. Экзамендәр тураһындағы инструкцияны тулыһынса дөрөҫ үтәүгә бигерәк тә иғтибар итергә кәрәк.

Экзамендәрҙе һәм һынауҙарҙы үткәреүҙә төп ролде, әлбиттә, укытыусы уйнаясак. Тыуған илебеҙ каршыһында үҙенең яуаплылығын аңлаған һәр бер укытыусы балаларҙың белемдәре тәрәнерәк һәм нығырак булыһы өсөн, һис шикһеҙ, үҙенең көсөн һәм вакытын кыҙғанмай.

Республикабыҙҙың алдынғы укытыусылары үҙ кластарында ҙур эштәр үткәрәләр. Улар укыусылар өсөн якшы консультациялар, обзор лекциялары ойошторалар, экзамендәрҙең әһәмиәте тураһында ата-әсәләргә аңлаталар. Был осорҙа уларҙың эштәре айырыуса катмарлы. Шуға күрә укытыусының вакытын һакларға, төрлө йыйылыштар һәм ултырыштарҙы йыш яһамаҫка, уға үҙенең почетлы бурысын тыныс башкарырлык мөмкинлектәр тыуҙырырға кәрәк.

Экзамен көндәрендә комсомол ойошмаларының ролдәре шулай ук ҙур. Улар мәктәп етәкселәренә систематик ярҙам итергә, бөтә якшы башланғыстарҙың инициаторы булырға бурыслылар. Өфөнөң 3, 11, 45-се мәктәптәре, Стәрлетамак мәктәптәре комсомол ойошмалары кластарҙы экзамендарға әҙерләүҙә актив катнашалар. [illegible] тор фото-витриналар укыусыларҙы экзамендарға өлгөлө әҙерләнеүгә саҡыралар. Был мәктәптәрҙә үҙ-ара ярҙам ойошторолған. Экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерләнеүселәр өсөн махсус бүлмәләр билдәләнгән, улар был эштең үҙәге булып әүерелделәр. Унда китаптар, карталар, күргәҙмә пособиелар куйылған, ошонда ук укыусылар квалификациялы консультациялар алалар. Мәктәптән тыш үткәрелә торған бөтә эштәр экзамендәргә әҙерләнеү бурыстарына, балаларҙы культуралы хеҙмәтләндереүгә һәм дәрес ял иттереүгә буйһындырылған. Комсомол комитеттәре экзамендәргә нисек әҙерләнеүҙәре тураһында айырым комсомолецтарҙы тыңлайҙар, уларға практик кәңәштәр бирәләр, иптәштәренә ярҙам итәләр. Ләкин бындай файҙалы эштәр күп комсомол ойошмаларында үткәрелмәй әле.

Бөтә мәктәп коллективенең дүҫ һәм ойошкан рәүештә эшләүе хәҙер бик мөһим мәсьәлә булып тора. Һәр бер укытыусы һәм укыусы, һәр бер коммунист, комсомолец һәм пионер үҙ мәктәбенең, үҙ класының намыҫы өсөн, һәр бер укыусының өлгәшеүе өсөн көрәшергә тейеш.

4, 7, 10-сы кластарҙа укыусыларҙы айырыуса хәстәрлек менән солғап алырға кәрәк. Улар өсөн эш бүлмәләре бүленһен, улар тейешле китаптар, пособиелар, карталар менән тәьмин ителһендәр, квалификациялы консультациялар һәм обзор лекциялары бирелһен, улар бөтә төр общественный эштәрҙән бушатылһындар. Көндәрен планлаштырыуҙа, хеҙмәт һәм ялды ойоштора белеүҙә был балаларға ярҙам итергә кәрәк. Тик ошо шарттарҙы дөрөҫ үтәгәндә генә улар ҙур уңыштарға ирешәсәктәр. 10-сы класс укыусылары белем өлгәшеүен генә түгел, бәлки үҙҙәренең ихтыярҙары һәм характерҙәре өлгөргәнлеген дә күрһәтергә тейештәр.

Экзамендәр башланыуға бер нисә көн генә калды. Был кыҫка вакыт эсендә мәғариф органдары һәм мәктәп етәкселәре укытыусыларҙың һәм укыусыларҙың нисек әҙерләнеүҙәрен, материалды нисек кабатлауҙарын, заданиеларҙы нисек үтәүҙәрен тикшерергә бурыслылар. Был эштең үҙәгенә инергә, билет һорауҙарына ғына механик яуаптар әҙерләүҙән балаларҙы һакларға кәрәк.

Урындағы партия һәм совет органдары ошо калған срок эсендә мәктәптәрҙең экзамендәргә әҙерлек кимәлен тикшерергә тейештәр. Экзамен тотоу өсөн күрше ауыл мәктәптәренә барыусы укыусылар өсөн транспорт булдырыуға, тукландырыуҙы ойоштороуға шулай ук кәрәкле иғтибар бирелһен.

Ләкин, бурыстарҙың шул тиклем катмарлы һәм яуаплы булыуына карамаҫтан, ВКП(б)-ның кайһы бер райкомдары (мәҫәлән, Кариҙел, Көйөргәҙе һәм башкалар) экзамендәргә әҙерләнеүҙе баһалап еткермәйҙәр, улар хатта район мәғариф бүлектәре мөдирҙәрен, инспекторҙарын башка эштәргә мобилизовать итеүгә барып еткәндәр. Был партия өлкә комитетенең күрһәтмәләрен ғәфү ителмәҫлек боҙоу булып тора.

Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнеү һәм уларҙы үткәреү осоронда бөтә мәғариф работниктәре, мәктәп директорҙары үҙ постарында торорға тейештәр. Сөнки [illegible]

Бөтә общественность, бөтә партия һәм комсомол ойошмалары был хәл иткес көндәрҙә мәктәпкә якындан ярҙам итһен, уны өтәйҙәрсә тәрән хәстәрлек менән солғап алһын.

М. Емасова,
ВКП(б) Өлкә Комитетенең мәктәптәр бүлеге мөдире.

Беренсе класс бораулау мастеры

Беҙҙең алдыбыҙҙа ҙур тормош юлын үткән, үҙенең ғүмерендә күп кыйынлыктарҙы сигеп, катмарлы бораулау эшенең оҫтаһы булып етешкән ябай рус кешеһе. Уны тәүге карашта үҙе менән бергә эшләүсе кешеләрҙән, шул ук бораулаусыларҙан, слесарҙарҙан айырып та булмай. Уның тышкы күренешендә һеҙ айырылып торорлок артык үҙенсәлекле нәмә һиҙмәйһегеҙ.

Ләкин был ябай совет кешеһенең тормош юлы ғәжәп бай.

...Бынан егерме йыл самаһы элек әле йәш үҫмер Ваня Куприянов үҙ алдына тормош итеү юлына аяк баҫа. Уның хеҙмәт юлы Молотов өлкәһенең Чусовой нефть промыселдарында башланып китә.

Иван Дмитриевич Куприяновтың бораулаусы булып эшләй башлауына ағымдағы йылдың бөлендә ун һигеҙ йыл тула. Бораулаусының хеҙмәте катмарлы ла, ол күңелле лә... Ер аҫтына йөҙҙәрсә һәм мең метр тәрәнлеккә, нефть фонтаны өскә урғылғанға тиклем бораулаған вакытта нинди кисерештәр һәм нинди тулкынланыуҙар ғына үткәрмәй ул, бораулаусы. Бораулаған скважинак — ер аҫтынан «кара алтын» фонтаны урғылып сыкканда нинди ҙур шатлыктар солғап ала! Әммә ошо сакта инде бораулаусылар үҙ хеҙмәтенән дә матурырак һәм шатлыклыраҡ нәмә донъяла юк икәнен аңлап ҡалалар.

Был йылдар Иван Дмитриевич өсөн ҙур тәжрибә мәктәбе булып торҙо...

Йәш бораулаусы күптән түгел «Икенсе Баку» районына инган Ишембай нефть промыселенә килә. Бында бораулаусы, ә аҙак мастер булып эшләй. Уның ныкышмалы һәм намыҫлы хеҙмәте менән бораулаған һәм Тыуған илебеҙгә күп меңләрсә тонна нефть биргән скважиналарҙы тиҫтәләрсә күрергә мөмкин. Ишембайҙа эшләүенең һуңгы йылында — 1943 йылда Иван Дмитриевич 800 метр тәрәнлегендә скважиналарҙың береһең станок-айға 1069 метр тиҙлегендә бораулап, ҙур оҫталыкка эйә булғанлығын күрһәтте.

Туймазыла, тәрән девон ятышлы скважиналарҙы бораулауҙа уның таланты бигерәк тә киң үсеш алды. Тәүге буровойы, үҙе әйткәнсә, һәҙерләһеҙ тамамланған булһа, ә инде калғандарының бөтәһе лә ысын оҫталык, ҙур тиҙлек менән бораулаңдылар. Куприянов 1945 йылда Октябрьскийҙа 1237 һәм 412-се номерле буровойҙарҙа ул вакытта иң юғары рекорд бирҙе. 412-се номерле скважина ротор менән станок-айға 450 метр тиҙлегендә бораулаңып бөттө. Был да шулай ук девон скважиналары өсөн рекорд ине.

Ләкин мастер өлгәшелгәндәре менән генә тынысланып калманы. Ул тағы ла юғарырак тиҙлеккә өлгәшеү, ил байлығын арттырыу өсөн яңы юлдар һәм методтар эҙләй. Мастерҙең эҙләнеүҙәре бушка китмәне. 1947 йылда 131-се буровойҙы бораулағанда ул яңы рекорд куйып, бораулаусыларға оҫталыктың ҙур өлгөһөн күрһәтә. Бригада станок-айға 670 метр тиҙлектә бораулай.

Был еңеү мастерға үҙенән-үҙе генә килмәне. Уны Куприянов бригадаһы ныкышмалы хеҙмәт менән яулап алды. Мастер үҙенең алдына, тәүге карашка ябай күренгән, ләкин тәрән мәғәнәле бурыс—вакытты уҙыу, тиҙләтелгән бораулау режимен барлыкка килтереү һәм бригадаһында эшләүсе ун дүрт кешенең юғары етештереүсәнлекле эшләүен тәьмин итеү бурысын куйҙы.

Мастер бығаса файҙаланылмай яткан резервтарҙы хәрәкәткә килтерҙе. Бригада насостарҙың көсәтен тулырак файҙалана башланы, ә был, үҙ нәүбәтендә, бораулаған породаларҙан забойҙы даими рәүештә якшы итеп йыуҙырыуҙы тәьмин итте. Насостарҙың етештереүсәнлеге секундына 34 метрға еткерелде. Был, долотоларҙы дөрөҫ һайлап алғанда һәм уларға нагрузканы дөрөҫ биргәндә проходканың механик тиҙлеген, башка буровойҙарҙағы 1,5 метрға карағанда, сәғәтенә 2,6 метрға еткереүгә мөмкинлек бирҙе.

Куприянов үҙенең бораулаусылары менән төшөрәү-күтәртеү операцияларын ғәжәп тиҙлектә башкара. Бораулау торбаһын төшөрәү-күтәртеү 3—4 минут кына вакыт ала. Был, башка буровойҙарға карағанда, бер ярым — ике тапкыр тиҙерәк тигән һүҙ.

Беҙ уйың башка сараларына катылып тормайынса, мастерҙең ҙур иҗади эҙләнеүҙәре тураһында ғына әйтергә теләйбеҙ. Ул һаман да ҙур һәм кыйыу новатор булып тора. Бына долотоларҙы файҙаланыу мәсьәләһен алайык. Ул каты породалы катламдарға долотоға нагрузканы 15—17 тоннаға еткерә, йомшак породалы катламдарҙа 10—12 тоннанан артмай. Был кыйыу эҙым үҙен акланы. Башка күп кенә мастерҙар долотоны забойҙа тамам үтмәҫләнгәнсә тоталар. Ә Куприянов бөтөнләй башкаса. Әгәр яңы долото тәүге сәғәттә сәғәтенә 4—5 метр проходка бирһә, өсдүрт сәғәттән һуң ул ике метр самаһы ғына бирә. Ул вакытта инде мастер бораулауҙы туктатып, долотаны алмаштыра. Моторҙарҙың, насостарҙың көсөн файҙаһыҙға тукмай. Төшөрәү-күтәртеү операцияларында вакытка экономия яһау якшырак һәм шуның аркаһында долотоларҙан да күберәк файҙа алырға була.

Иван Дмитриевич үҙенең хеҙмәте һәм тормошо менән башкаларға өлгә булып тора һәм уларҙы большевистик теми менән эшләүгә күтәрә.

Үҙенең бөтә көсөн, оҫталығын Тыуған илебеҙҙен нефть байлығын арттырыуға һалған, беренсе класс бораулау мастеры булыуға өлгәшкән Иван Дмитриевичтең хеҙмәте юғары баһаланды. Уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Был юғары исемде алыуға достойны булған мастер менән нефтселәр генә түгел, бәлки бөтә Башкортостан хеҙмәтсәндәре ғорурлана.

— Мин, — тине иптәш Куприянов трест коллективенең һәм үҙенең хеҙмәте баһаланыу айҡанлы үткәрелгән нефтселәр митингыһында — бөйөк наградаға яуап итеп ер аҫтына тағы ла кыйыуырак һөжүм итергә, быйыл һәр станок-айға 1000 метр тиҙлегендә бораулауға һүҙ бирәм...

Атаклы мастер, Социалистик Хеҙмәт Геройы Иван Дмитриевич Куприяновтың һүҙе эшенән айырылмаясағына шикләнмәҫкә мөмкин.

И. Болдогоев,
Октябрьск калаһы.

Даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар эшләмәйҙәр

Калкан ауыл Советенең беренсе сессияһында даими хәрәкәт итеүсе комиссияларға етәксе итеп яңы һайланған депутаттар билдәләнгәйне. Был көндән бирле 3 айҙан артык вакыт үтте инде, ләкин хәрәкәт итеүсе комиссиялар практик эшкә тотонғандары юк әле.

Был комиссиялар нигеҙҙә комиссия етәкселәренең үҙҙәренә тапшырылған эштәрҙе — депутатлык бурыстарын үтәүгә яуапһыҙ карауҙарынан булһа, икенсенән ауыл Советенең (председателе иптәш Хажин) хужалык һәм общественный эштәргә депутаттарҙы йәлеп итмәүенә кайтып кала.

Миҫалға ошондай фактылар килтерергә була. Ауыл Советенең сессияһында беренсе кварталда акса туплау планының үтәлеше тураһында иптәш Хажиндең информацияһы тыңлана. Ә финанс-бюджет комиссияһының председателе депутат иптәш Аскаров, акса туплау эшендә катнашмаған кеүек, сессияға кон тәртибе әҙерләүҙән дә ситтә торов кала.

Культура-ағартыу комиссияһының председателе иптәш Шайхетдинов депутатлык вазифаһын үтәүҙә бигерәк тә эшлекһеҙлек күрһәтә. Иптәш Шайхетдинов бригадир булып эшләгән «Рысай» колхозында культура-ағартыу эштәре бөтөнләйгә үҙ ағышына тапшырылған.

Калкан ауыл Советына ингән «Баш-Урал», «Рысай», «Үкәҙе» колхоздары яҙғы сәсеүгә башлап төшкән көндә ук, эштә ҙур етешһеҙлектәр һиҙелде. Ат көстәре етешмәүгә карамаҫтан, улар урынлы файҙаланылмайҙар. Бына был комиссиялар яҙғы сәсеүҙен срогын оҙайтыуға сәбәп булыу куркынысын тыуҙыралар. Ауыл хужалығы комиссияһы (председателе иптәш Хәкимов) үҙенең практик эшен яҙғы сәсеүҙе кыҫка срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә табан йүнәлдерергә һәм был эшкә үҙенең члендарын мобилизовать итергә тейеш.

Кыҫкаһы, ауыл Советы даими хәрәкәт итеүсе комиссияларының эштәре менән оператив етәкселек итергә һәм уларҙың члендарының депутатлык вазифаһын эҙмә-эҙ үтәүҙәрен талап итергә тейеш. Даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың эштәрен йәнләндереү өсөн, ауыл Советтары өҫтөнән Учалы район Советы исполкомының да конкрет етәкселеге талап ителә.

М. Хәйҙаров.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Берлиндең көнбайыш секторҙарында полициялар демократик ойошмаларҙы эҙәрләүҙәрен дауам иттерәләр

Берлин коменданттары урынбаҫарҙарының ултырышында

БЕРЛИН, 10 май. (ТАСС). Берлин коменданттары урынбаҫарҙарының 7 майҙа булып үткән нәүбәттәге ултырышында совет вәкиле полковник Елизаров Берлиндең көнбайыш секторҙарында демократик ойошмаларҙың һәм Германияның берҙәмлеге яҡлы кешеләрҙең эҙәрләнеүе тураһында белдереү яһаны.

Һуңғы ваҡытта булған ваҡиғалар, тине Елизаров, көнбайыш секторҙарҙа демократик элементтәрҙең эҙәрләнеүенең туҡталмағанлығын, ә, киреһенсә, көсәйгәнлеген һәм бөтә демократтарға һәм Германияның берҙәмлеге яҡлы бөтә кешеләргә ҡаршы полиция террорының иң ҡурҡыныс формаһын алдылар. Америка хәрби полицияһы етәкселегендәге немец полиция отрядтәре Америка секторында демократик ойошмаларға погромдар яһайҙар, уларҙың был хәрәкәттәренә бер ниндәй ҙә сара күрелмәй. Улар демократик ойошмаларҙың биналарын һәм сейфтәрен ваталар һәм ойошмаларҙың члендарен туҡмайҙар һәм уларҙы башҡаса мәсхәрәләйҙәр.

Совет вәкиле полицияның погром хәрәкәттәренең конкрет фактыларын килтерҙе. Мәҫәлән, 19 апрелдә Рейникендорфта (Франция секторы) профсоюздарҙың район бүлегенә һөжүм яһалды, һәм Америка секторында булып үткән һөжүмдәр ваҡытында ла шкафтар һәм сейфтәр ватылған. Шул уҡ Рейникендорфта, 25 апрелдә, профсоюздарҙың район правлениеһенә яңы һөжүм ителгән, был һөжүм ваҡытында правление члендәренә ҡарата мәсхәрәләү хәрәкәттәре эшләнгән.

«Ҡара гвардия» тип атала торған ойошманың «эшмәкәрлеге» һуңғы ваҡытта Берлин халҡы араһында бигерәк тә ҙур тынысһыҙлыҡ тыуҙыра. Америка оккупацион властәре тарафынан ойошторолған һәм ҡоралландырылған был гвардия Берлиндәге демократик элементтәргә ҡаршы террор ҡуллана. 26 апрелдә «ҡара гвардияның» ҡоралды отряды «Азат немец йәштәре» ойошмаһы члендәренең бер төркөмөнә һөжүм итте. Был һөжүм итеү һөҙөмтәһендә дүрт егет ҡаты яраланған. Был яра уларҙың йәшәүе өсөн ҡурҡыныс булып тора. 27 апрелдә «ҡара гвардияның» икенсе отряды йәштәр ойошмаһы район правлениеһенең председателе Эрвин Хюбнерға һөжүм яһаны. Немец полицияһындағы демократик хеҙмәткәрҙәрҙең «ҡара гвардия» хәрәкәттәренә ҡаршылыҡ күрһәтеүгә йүнәлтелгән бөтә тырышлыҡтары Америка хәрби властәре тарафынан туҡтатыла.

Демократтарҙы һәм демократик ойошмаларҙы эҙәрләү бигерәк тә Берлиндең көнбайыш секторҙарында май алды көндәрендә көсәйҙе. 1 Май байрамы алдынан Америка хәрби администрацияһы урамдарҙа 1 Май байрамына арналған лозунгылар һәм плакаттар элеүҙе тыйыусы приказ сығарҙы.

Америка секторындағы ҡоралды патрулдәр 29 һәм 30 апрелдә Берлиндә йәшәүсе күп кенә кешеләрҙе ҡулға алдылар һәм уларҙы Берлиндең берҙәмлегенә һәм Германияның берҙәмлегенә саҡырыусы плакаттар йәбештергәндәре өсөн ғәйепләнеләр. Урамдарҙа полицияның баш-баштаҡлығы һәм законһыҙ хәрәкәттәр менән генә сикләнмәйенсә, Америка секторындағы полициялар шул уҡ 1 Май плакаттарын эҙләп айырым квартираларға инделәр.

Коменданттар урынбаҫарҙарының ултырышы шулай уҡ эшселәр менән предпринимателдәр араһында конфликттәр килеп тыуған ваҡытта татыулаштырыусы һәм арбитраж комиссияларының составына һәм эшенә ҡарата ҙур Берлиндең контроль советының 35-се номерле законын ҡулланыу тураһындағы мәсьәләне тикшерҙеләр. Был мәсьәлә коменданттарҙың ҡарамағына тапшырылды.

Ултырыш аҙағында Британия вәкиле, 1948 йылдың 1 апреленән башлап Британия зонаһынан Берлинга индерелә торған күмер хаҡы, Британия властәренең бойороғо буйынса, тоннаһына 10 маркаға күтәрелә, тип белдерҙе.

Совет вәкиле, күмер хаҡын күтәреү тураһында Британияның ҡарары бер яҡлы булып тора, тип белдерҙе. Ошондай бер яҡлы хәрәкәттәр Берлиндең экономикаһы өсөн ауыр эҙемтәләр тыуҙыралар, сөнки улар хаҡтарҙың күтәрелеүенә ярҙам итәләр һәм Берлин халҡына котолғоһоҙ рәүештә зыян килтерәләр. Бынан сығып, совет комендатураһы Британия властәренең ошо күрһәтелгән бер яҡлы ҡарарын, һис кисекмәҫтән, ғәмәлдән сығарыуҙы талап итә.

Чехословакияла коммунистәр партияһының үҫеүе

ПРАГА, 11 май. (ТАСС). Чехословакия коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетының мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 1948 йылдың 8 майына коммунистәр партияһында 2.000.048 член бар.

Чехословакияла һайлауҙар алдынан

Чехословакия коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетының мөрәжәғәте

ПРАГА, 11 май. (ТАСС). Милли собраниеға буласаҡ һайлауҙар айҡанлы Чехословакия коммунистәр партияһының Үҙәк Комитеты республиканың бөтә граждандарына мөрәжәғәт иғлан итте.

Закон менән билдәләнгән срокта, 30 майҙа, тип әйтелә мөрәжәғәттә, беҙҙең халҡыбыҙ яңы парламентҡа һайлау өсөн һәм демократик юл менән үҙенең ниндәй хөкүмәтте теләгәнлеген әйтеү өсөн һайлау урналарына барасаҡ. Яңыртылған милли фронт, уның бөтә партиялары һәм общественный ойошмалар һайлаусыларға дөйөм кандидаттар исемлеген тәҡдим итәләр. Был исемлектә беренсе кандидат итеп, премьер-министр Клемент Готвальд яҙылған.

Буласаҡ һайлауҙарҙа түбәндәге мәсьәләләр хәл ителәсәк: хөкүмәт өсөнмө йәки хөкүмәткә ҡаршымы? Халҡ-демократик режиме өсөнмө йәки уға ҡаршымы? Республика өсөнмө йәки уға ҡаршымы?

Мөрәжәғәттең һөҙөмтәләү өлөшөндә Чехословакия коммунистәр партияһы «бөтә чехтарҙы һәм словактарҙы республика бәхете өсөн хеҙмәт итергә» саҡыра. Ул дуҫлыҡҡа һәм берҙәмлеккә, 30 майҙа буласаҡ һайлауҙарҙа берҙәм кандидат исемлегенең еңеүенә уларҙы саҡыра. Был көндө беҙҙең халҡыбыҙҙың суверенный теләге беҙҙең артабанғы юлыбыҙҙы раҫлар һәм билдәләр, тип әйтелә мөрәжәғәттә.

Луиджи Эйнауди Италия республикаһының президенте итеп һайланды

РИМ, 11 май. (ТАСС). Тауыш биреүҙең өсөнсө туры һөҙөмтәһендә кандидаттарҙың береһе, талап ителгәнсә, тауыштарҙың өстән ике өлөшөн ала алмағанлыҡтан, республика президенте һайланмағас, тауыш биреүҙең дүртенсе туры үткәрелде. Дүртенсе турҙа, конституцияға ярашлы рәүештә, президент һайлау өсөн, килгән депутаттарҙың абсолют күпселек тауышы етерлек булды.

Рим радиоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, ултырышта 872 депутат ҡатнашҡан, уларҙың 871-е тауыш биргән.

Тауыштарҙы иҫәпләгәндән һуң депутаттар палатаһы председателе Гронки, Эйнауди кандидатураһы өсөн 518 депутат, Орландо кандидатураһы өсөн —320 депутат һәм башҡа кандидаттар өсөн 4 депутат тауыш бирҙе, тип белдерҙе. Ҡалған бюллетендәр тултырылмаған килеш бирелделәр. Гронки Италия республикаһы президенте итеп Луиджи Эйнаудиҙең һайланыуы тураһында белдерҙе.

Эйнауди 1874 йылда тыуған, ул күренекле экономист. Либераль партияла член. Де Гаспери кабинетында Эйнауди министрҙар советы председателенең урынбаҫары посын биләгән һәм шул уҡ ваҡытта бюджет координацияһы министры булған. Эйнауди шулай уҡ Италия банкыһының управляющийы булып тора.

АҠШ-та Уоллес яҡлы кешенең үлтерелеүе

НЬЮ-ЙОРК, 11 май. (ТАСС). Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, 7 майҙа Чарлстонда (Көньяҡ Каролина штаты) Уоллестең дошманы Рудольф Серрео «Уоллесте президент итеп һайлау өсөн Чарлстон комитеты» председателе, производство профсоюздары конгресына инеүсе моряктәрҙең урындағы профсоюзы вәкиле Роберт Ньюзҙы бысаҡ менән сәнсеп үлтергән. Нью урындағы профсоюз бинаһында үлтерелгән. Бында Серрео элек профсоюз йыйылышын туҡтатып тауыш сығарған һәм йыйылыштан ҡыуылған булған. Серрео моряктәр профсоюзының уң ҡанаты менән бәйләнеш тота, тип күрһәтәләр.

«Дейли Уоркер» газетаһының күрһәтеүенә ҡарағанда, Чарлстон полицияһы үлтереүсе ҡулға алынғандан һуң матбуғат өсөн яһаған белдереүендә Серреоның коммунизмға ҡаршы яһаған белдереүен айырыуса билдәләгән. Полицияның белдереүенә ҡарағанда, Серрео үҙенең «иҫерек хәлдә» Ньюға бысаҡ менән сәнескәнлеге һәм «писек кенә булмаһын Ньюзың коммунист һәм Уоллес яҡлы кеше булыуы» тураһында белдергән.

Грецияла үлтереүҙәр һәм ҡулға алыуҙар яңынан башланды

АФИНЫ, 11 май. (ТАСС). Кисә Болоста 15 коммунист атып үлтерелде. Улар партизандарға ярҙам күрһәтеүҙә ғәйепләнәләр. «Эллиникон Эма» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 8 майҙа Солоникиҙә Даламангас атып үлтерелгән. Ул 1944 йылда декабрь һуғыштарында ҡатнашлыҡ иткәне өсөн үлем язаһына хөкөм ителгән.

Газеталарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, һуңғы көндәрҙә Пирейҙа 120-нән артыҡ «коммунист һәм шикле кеше» ҡулға алынған. Уларҙың ҡайһы берҙәре хәрби судҡа биреләсәк, ә ҡалғандары «общественный тәртип өсөн ҡурҡыныслы кешеләр булыуҙары өсөн» утрауҙарҙағы концлагерҙарға һөргөнгә ебәрелә.



Һүрәттә: Өфө агрегат заводының ... эшселәре өсөн хужалыҡ юлы менән төҙөгән йорттар.

М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Фельетон

Иртәгә һуңға инерһегеҙ...

Урта буйлы, ғәҙәттән тыш тулы кәүҙәле кеше, сәманан тыш шыплап, тығыҙлап тултырылған ҡалын портфелен тотоп, [illegible] — күк көмбәҙгә [illegible] ҡарап, һәр көн һайын Иглин урамдарынан үтә. [illegible] был кешенең райкомхоз начальнигы икәнлеген дә, фамилияһы Гушин, исеме — Федор икәнлеген дә һәр кем белә. [illegible] Ләкин Иглиндәге хеҙмәткәрҙәрҙең байтаҡ өлөшө райкомхоз квартираларында торғанлыҡтан [illegible] Гушиндең [illegible].

Үҙенең ошо иғтибарын [illegible].

Квартиралары ремонтҡа мохтаж булған хеҙмәткәрҙәр, электән уҡ вәғәҙә ителгән ярҙамды тиҙ арала өмөт итмәйҙәр ҙә, Гушиндең кабинетына йыш-йыш киләләр.

— Һаулығығыҙ, кәйефегеҙ нисек, Федор Михайлович?—тип, [illegible] Гушин бер төрлө темперамент менән [illegible]. Алдында ятҡан ҡағыҙҙарҙы ҡыштырлата-ҡыштырлата бер аҙ [illegible] һуң, башын күтәреп, [illegible] һүҙ әйтә:

— Иртәгә һуңға инерһегеҙ.

Хеҙмәткәр [illegible] булһа, Гушиндең үҙенең һүҙ матурлығын күрһәтергә тура килә ине:

— Белһәгеҙме, беҙҙең квартиралары ремонтлау планлаштырылмаған әле. [illegible] хәл итербеҙ.

Бында килеп, [illegible] урта мәктәп уҡытыусыһы Егорова [illegible] Гушиндең кабинетына [illegible].

— Беҙҙең фатирҙарҙың [illegible].

— Насар ғына түгел, емерелеп төштө, [illegible] Гушин. [illegible]

—...Так, так...—ти Гушин, бармаҡтары менән өҫтәл таҡтаһын барабанлап, тәҙрә аша урамға ҡарап тора һәм ҡапыл тағы ла йөнләнеп китә. — Яҙ көнө лә баһа, тиҙҙән йәй етә. Түшәм асыҡ булғас, күкте күҙәтеп, йондоҙҙар [illegible]

[illegible]

һығымталарға килтереүсенән [illegible] министратив һығымта яһарға [illegible] ҡыт икәнлеген әйтеү ҙә бик [illegible] кән.

Ғ. Әхм[illegible]

Беҙҙең республикала

Курорттарҙа йәйге сезон

Республиканың курорттарында йәйге сезон башланды. Быйыл күпселек курорттар йәйге сезонды ҙур әҙерлек менән ҡаршыланылар. Шафран санаторие яңы павильон, эстрада беседкалары төҙөнө. Шуның менән бергә уның ярҙамсы хужалығы ике тапҡырға киңәйтелде.

Аксаков һәм Чехов исемендәге санаторийҙарҙе ремонтлау һәм йыһазландырыу өсөн 2,5 миллион һум аҡса тотолдо. Йоматау санаториендә ял итеүселәр электр, һыу һәм ҡымыҙ менән дауаланасаҡтар. Ағымдағы йылда республикабыҙҙың Аксаков, Чехов исемендәге, Шафран, Йоматау, Янғантау, Красноусол санаторийҙәре, Бөрө, Стәрлетамаҡ, Өфө ял йорттарында бөтәһе 20 меңгә яҡын кеше ял итәсәк.

Һалсылар өсөн китаптар

Башҡортостандың һал ағыҙыу предприятиеләре эшселәрен навигация осоронда культуралы хеҙмәтләндереү өсөн 14 библиотека ойошторолдо. Һәр бер библиотека 100 китаптан тора. Улар эсендә Ленин һәм Сталиндең айырым хеҙмәттәре, халҡ хужалығының һәр төрлө мәсьәләләре буйынса брошюралар, художество әҙәбиәтенән Пушкин, Салтыков-Щедрин, Добролюбов, Тургенев, Катаев, Полевой һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәре бар.

Ағиҙелдә һал ағыҙыуҙа эшләүсе эшселәр өсөн йөҙөп йөрөүсе ос ҡыҙыл мөйөш радиоприемниктәр һәм репродукторҙар менән йыһазландырылған. Бында һал ағыҙыусылар ял ваҡытында радио тыңлайҙар, газета уҡыйҙар, шашка, домино уйнайҙар.

Навигация осоронда һаллау һәм һал ағыҙыу пункттарында ете күсмә кино эшләй.

Йәйге сессиялар алдынан

Башҡорт АССР-ы Мәғариф Министерствоһы юғары уҡыу йорттарында студенттарҙың һәм ситтән тороп уҡыусыларҙың йәйге сессияға әҙерлеге тураһында кәңәшмә үткәрҙе. Кәңәшмәлә педагогия институты, уҡытыусылар институттары һәм уҡытыусыларҙың белемен камиллаштереү институты директорҙарының сессияға әҙерләнеү буйынса информациялары тыңланды.

Кәңәшмәлә Мәғариф министренең урынбаҫары иптәш Хәмматов һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының мәктәптәр бүлеге мөдире иптәш Емасова йәйге сессияларҙы өлгөлө үткәреү тураһында телмәрҙәр менән сығыш яһанылар.

Колхозсыларға медицина ярҙамы

Баҫыуҙа яҙғы сәсеүҙә эшләүсе колхозсыларға көндәлек медицина ярҙамы күрһәтеү өсөн Иглин район үҙәгендәге больницалар һәм ауыл Советтәре эргәһендәге фельдшер-акушер пункттары ҙур әҙерлек алып барғайнылар.

Хәҙер был әҙерлектең һөҙөмтәләрен күрергә мөмкин. Баҫыу становына 30 комплект күсмә аптека ебәрелде. Врачтарҙан 7, фельдшерҙарҙан 42 кеше баҫыуҙа эшләүселәргә көндәлек медицина ярҙамы күрһәтә, колхозсылар менән беседалар үткәрә. Врач Покловская, фельдшерҙарҙан Лаптева, Филатова иптәштәр үҙҙәренә йөкмәтелгән яуаплы бурысты намыҫ менән башҡаралар.

Иртә өлгөргән йәшелсәләр

«Завет Ильича», «Вторая пятилетка», Фрунзе, Ромашенко колхоздары иртә өлгөрә торған йәшелсәләрҙе — һуған, редиска, салатты парниктәрҙә үҫтерҙеләр.

Өфө районының был ауыл хужалығы артелдәре башҡала баҙарына иртә өлгөрөүсе йәшелсәләрҙе килтерҙеләр.

Колхоздарҙа машиналар һаны арта

Ғафури районының колхоздары үҙған йыл государствонан өс автомашина, 42 иген елгәргес, ярым ҡатмарлы 12 молотилка алғайнылар. Быйыл тағы ла райондың дүрт колхозына автомашина алыуға ҡарап бирелде. Бынан тыш, райондың колхоздары ағымдағы йылда государствонан ярым ҡатмарлы 8 молотилка, 6 сортировка һәм байтаҡ һанда башҡа машиналар аласаҡтар.

Бурлы МТС-ында ла ауыл хужалығы машиналары һаны йылдан-йылға арта. Колхоздарҙы хеҙмәтләндереү эше яҡшыра. Быйыл МТС 12 трактор һәм күп кенә яңы машиналар аласаҡ. Улар араһында быға саҡлы МТС-та булмаған яңы төр машиналар бар. Мәҫәлән, үҙе йөрөй торған ике комбайн, сөгөлдөр сәсә һәм ҡаҙый торған машиналар.

Донъя шахмат чемпионаты

Матч-турнирҙа, гроссмейстер Ботвинник үҙенә беренсе урынды һәм донъя чемпионы исемен тәьмин иткәндән һуң, ҡалған өс турҙа көрәш икенсе урын өсөн генә барасаҡ. Смыслов, Решевский һәм Керес был маҡтаулы урынға иҫәп тота алалар.

11 майҙа уйналған 23-сө турҙа Смыслов — Ботвинник, Решевский—Керес осраштылар.

Һәр ике партия ла тыныс барҙы. Смыслов партияны Ферзе гамбите менән башланы, Ботвинник быны ҡабул итте. Ботвинник уйынды йәһәт тигеҙләштерҙе. Улар тиҙҙән фигураларҙы алмаштыра башланылар һәм 17-се йөрөштә партия отошһоҙ бөттө.

Решевский — Керес партияһы үҙ-ара алмашлы уңыш менән барҙы. Улар Нимцовичтең һаҡлау юлы буйынса иң билдәле варианттарҙың береһен уйнанылар. 2... йөрөштә партия ике яҡтың да ... мауы менән тамамланды.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башҡортостан Государство Академ драма театрында — «БАЙ ҺӘМ ХЕҘМӘТСЕ». Киске 8 сәғәт 30 минутта башлана.

Башгосфилармонияла — Свердловск гостеатр эргәһендәге лилипуттарҙың музыкаль комедия гастроле — «БАЯДЕРА». Киске 9 сәғәттә башлана.

Матросов исемендәге кинотеатрҙа — «ЙӘШ ТАЛАНТТАР КОНЦЕРТЕ».

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-44, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26

П 01772 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14600.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

28-се йыл сыға

1948 йыл
№ 96
15
май
шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ХӘҘЕР РЕСПУБЛИКА БАСЫУҘАРЫНДА ЮҒАРЫ УРОЖАЙҘЫҢ ЯҘМЫШЫ ХӘЛ ИТЕЛӘ. МЕХАНИЗАТОРҘАРҘЫҢ БУРЫСЫ — ҺӘР БЕР ТРАКТОРҘЫ ТӘҮЛЕК ӘЙЛӘНӘҺЕНӘ ЭШЛӘТЕҮҘӘН ТОРА. (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Струков. — Цех партгруппалары. (2-се бит).

АГИТАТОРҒА ЯРҘАМҒА. З. Вәхитов. — Ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме ниндәй уңыштар өсөн бирелә. (2-се бит).

П. Д. Мирко. — Экономия режимы — хужалыҡ итеүҙең социалистик методы. (2-се бит).

ЯҢЫ БИШ ЙЫЛЛЫҠ ТӨҘӨЛӨШТӘРЕНДӘ. А. Кальметьев. — Ҡарлыман шәкәр заводы ни өсөн аҡрын төҙөлә. (3-сө бит).

ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Мәхмүт Сәйҙәкәэ. — «Беҙҙең быуын» (3-сө бит).

М. Айбек. — Алишер Навои. (3-сө бит).

Уоллестең иптәш Сталинға яҙған асыҡ хаты (4-се бит).

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата. (4-се бит).

Трактор эштәренең темпын һәм сифатын күтәрергә

Яҙғы сәсеү эштәрен үткәреүҙә МТС-тарға быйыл айырыуса ҙур һәм яуаплы бурыстар йөкмәтелә. Трактор эштәре күләменең үҙған йылдарға ҡарағанда күп артыуы, колхоздарҙа яҙғы һөрөү һәм сәсеү эштәренең күпселек өлөшө тракторҙар көсө менән үткәрелеүе механизаторҙарҙан быйыл икеләтә-өсләтә арттырылған темп менән эшләүҙе талап итә. Бер үк ваҡытта улар үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа урожай өсөн дә тулы яуап бирәләр. Ә сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәрмәйенсә тороп, юғары урожай алыу тураһында уйларға ла ярамай.

Шуға күрә лә, МТС-тар яҙғы баҫыу эштәрен колхоздар менән төҙөшкән договор буйынса үҙ ваҡытында, юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн бөтә көстө туплауға тейештәр. МТС-тар быйыл, үҙған йылдарға ҡарағанда күп яҡшыраҡ эшләй алалар. Трактор бригадалары байтаҡ яңы тракторҙар һәм тағылма инвентарҙар алдылар. Етерлек тиклем запас частәр, инструменттар һәм яғыулыҡ менән тәьмин ителделәр. Механизаторҙарҙың бурысы хәҙер үҙҙәренең ҡулында булған был бай техниканы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн оҫта файҙаланыуҙан һәм һәр бер тракторҙың тәүлек әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итеүҙән тора.

Иртә культураларҙы сәсеү өсөн иң яҡшы агротехник сроктар үтеп барыуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙа сәсеү эштәре бик һүлпән бара. Күпселек район, МТС һәм колхоз етәкселәре быны яҙҙың һуҙылып килеүе менән аңлатмаҡсы булалар. Сәбәп унда түгел, әлбиттә. Тракторҙар паркының ошо көнгә тиклем ныҡлы эшкә ҡушылмауы сәсеү темпының түбән булыуында төп сәбәп булып тора. Иҫерлегән тракторҙар төрлө сәбәптәр менән әле булһа МТС усадьбаларында һәм бураҙналарҙа эшләмәй торалар. Усень-Ивановка МТС-ында баҫыу эштәренә башлауҙың тәүге көндәренән үк тиҫтәләгән тракторҙар строяҙан сығарылды. «Память Ленина» колхозында өс трактор берәһе лә эшләмәй. МТС директоры иптәш Иванов трактор бригадаларына техник ярҙам ойоштормай. Трактористар һәр бер деталь өсөн МТС-ҡа барып ҡиммәтле ваҡыттарын бушҡа уҙҙаралар. Нуриман, Олө-Тиләк, Архангель, Октябрь, Ерғән, Пугачев, Федоровка МТС-тарында ла тракторҙар сиктән тыш насар файҙаланылалар, күпселек бригадалар, яҡтыртыу булмағанлыҡтан, төндә эшләмәйҙәр.

МТС етәкселәренең колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәүгә яуапһыҙ ҡарауҙары, трактор бригадаларының эшен ойоштормауҙары баҫыу эштәренең оҙаҡҡа һуҙылыуына килтерә. 10 майға республикабыҙҙа тракторҙар менән 150 мең гектар ер эшкәртелеп, план бары 12,2 процентҡа үтәлде. Был ҙурлыҡлы артта ҡалыуға артабан юл ҡуйыу ҙур енәйәт ул. ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республика колхоздарында яҙғы сәсеүҙең барышы тураһында махсус ҡарар ҡабул итте һәм трактор паркының баҫыу эштәрендә бик насар файҙаланылыуын күрһәтте, МТС етәкселәрен был етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрөргә мәжбүр итте.

Быйылғы баҫыу эштәре юғары ойошҡанлыҡты, бөтә ресурстарҙы һәм мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланыуҙы талап итә. Алдынғы механизаторҙар шулай эшләйҙәр ҙә. Базан МТС-ында Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Рябов етәкселек иткән трактор бригадаһы трактористәре хәҙер бер генә уй һәм теләк—сәсеүҙе нисек тә тиҙерәк, яҡшыраҡ үткәреү теләге менән йәшәйҙәр. Улар көндөҙ ҙә, төндә лә смена заданиеларын арттырып үтәйҙәр. Приют МТС-ының Хөрмәт Ғәбәйҙуллин иптәш етәкселек иткән трактор бригадаһы май айының тәүге 10 көнө эсендә генә 557 гектар ер эшкәртте.

Бөтә трактор бригадалары һәм механизаторҙар ҙа алдынғылар кеүек эшләй алалар. Графикте эҙмә-эҙ үтәү, ерҙе предплужникле һабандар менән 20—22 сантиметр тәрәнлегендә һөрөү һәр бер МТС һәм тракторист өсөн закон. МТС етәкселәре графиктең үтәлешенә ныҡлы контроль яһарға һәм уның тулыһынса үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр. Эштә брак яһауға, ерҙе һай һәм сей ҡалдырып һөрөүгә юл ҡуйылырға тейеш түгел.

Хәҙер, баҫыу эштәренең хәл ителеүе көндәрендә, һәр бер сәғәт һәм минут ныҡлы иҫәптә булырға, һәр трактор тәүлегенә кәмендә 20 сәғәт эшләргә, бөтә бригадаларҙа ла эш ике сменала ойошторолорға тейеш. Бының өсөн бөтә трактор бригадаларын яҡтыртыу менән тәьмин итергә, төндә эшкәртеләсәк участкаларҙы алдан әҙерләп ҡуйырға кәрәк.

Трактор бригадаларында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һәм ныҡлы хеҙмәт дисциплинаһы булдырыу сәсеүҙең уңышлы үтеүен хәл итә. МТС директорҙарының политик эш буйынса урынбаҫарҙары һәм партия ойошмалары бөтә агитацион-массовый эште баҫыуға, трактор бригадаларына күсерергә, бөтә трактористарҙы ла социалистик ярыш менән солғап алырға тейештәр. Күлтән түгел Силәбе өлкәһе игенселәре сәсеүҙе алғаа үткәреү, юғары урожай үҫтереп алыу өсөн республикабыҙ игенселәрен социалистик ярышҡа саҡырҙылар. Механизаторҙар был ярышта еңеп сығыу өсөн тракторҙарҙың етештереүсәнлекле эшләүенә, смена заданиеларын көн һайын арттырып үтәүгә өлгәшергә тейештәр.

Район партия ойошмалары МТС-тарҙың эшен үҙ ағышына ҡуймаҫҡа, трактор бригадаларының эшен яҡшыртыуҙа, трактористарға үҙ ваҡытында техник ярҙам күрһәтеүҙә МТС етәкселәренә көндәлек ярҙам күрһәтергә бурыслылар.

БАССР Министрҙар Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

1948 йыл апрель айында республика промышленность предприятиеларының социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республика промышленность предприятиеларының 1948 йыл апрель айында социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлеше йомғаҡтарын ҡарап, Черниковск машиналар төҙөү заводын (директоры иптәш Ферин, ВКП(б) Үәк Комитетының заводтағы парторгы Толмачев, завком председателе Попков иптәштәр) социалистик ярышта еңеүсе тип таптылар һәм уға БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бирергә ҡарар иттеләр. Был байраҡ агрегат заводынан алып бирелә.

Шулай уҡ, апрель айында Белорет металлургия комбинатының, химик заводтың, Благовещен нефть машиналары төҙөү, агрегат, металл штамплау, «Металлоигланг» һәм тау оборудованиелары заводтарының яҡшы эшләгәнлектәре билдәләп үтелде.

1948 йыл апрель айында төҙөлөш ойошмаларының социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы республикалағы төҙөлөш ойошмаларының ағымдағы йылдың апрель айында социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡарап, төҙөлөш эштәрен үтәү буйынса «Башнефтезаводстрой» тресын (управляющие Старков, партком секретаре В. Н. Михайлов, постройком председателе С. М. Михайлов иптәштәр) социалистик ярышта еңеүсе тип таптылар һәм трестҡа БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын бирергә ҡарар иттеләр. Был байраҡ управляющие иптәш Башилов булған трестан алып бирелә.

Апрель айында Башстройтрестың, шулай уҡ кирбес, алебастр, эзбиз сығарыу программаһын байтаҡ арттырып үтәгән төҙөлөш материалдары промышленносе Управлениеһының яҡшы эшләгәнлектәре күрһәтеп үтелде.

Хәҙер республика баҫыуҙарында юғары урожайҙың яҙмышы хәл ителә

Механизаторҙарҙың бурысы — һәр бер тракторҙы тәүлек әйләнәһенә эшләтеүҙән тора

✪ ✪ ✪

Байыш МТС-ы графикте өҙә

ДҮРТӨЙЛӘ. (Телеграф аша). Байыш МТС-ы 1947—48 йылдың көҙгө-ҡышҡы сезонында тракторҙарҙы ремонтлау буйынса үткән сезондарға ҡарағанда яҡшыраҡ эшләне. Ремонт планы арттырылып үтәлде. Шунан сығып, МТС етәкселәре:

— Быйыл яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә ҡыйынлыҡтар булмаясаҡ, бөтәһе лә яҡшы барыр, — тип уйланылар һәм бөтөнләй урынһыҙ тынысландылар.

Яҙғы сәсеүгә сығыуҙың тәүге көндәре шул турала һөйләйҙәр. Баҫыу эштәре тарҡау рәүештә башланды һәм хәҙер ҙә шулай дауам итә. Шуға ҡарамаҫтан, был хәл МТС етәкселәре тарафынан бик нормаль, тип иҫәпләнә.

— Ни өсөн бөтә тракторҙы ла эшләтмәйһеҙ?—тигән һорауға МТС директоры иптәш Ғәсетҡулов һәм политик эштәр буйынса уның урынбаҫары иптәш Ғәлиев икеһе лә бер тауыштан:

— Ер еүеш, — тип яуап бирәләр. Улар үҙҙәренең был ҡарашлары дөрөҫлөгөн иҫбатлар өсөн практик сәбәптәр ҙә ҡулланалар.

Быны бер факт. Ер һөрөү өсөн өлгөргәс, «Маяҡ», «Алға», Калинин исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндереүсе бер трактор бригадаһының бригадиры иптәш Зарипов тракторҙарын эшкә башларға ҡушҡан. Ләкин был колхоздарҙа килгән иптәш Ғәлиев, ерҙең дымлы булыуына һылтау яһап, һөрөүҙе туҡтата һәм тағы ла 3—4 көн көтөргә бойороҡ бирә. Тракторҙар үҙ ауылдарына тараландылар.

Ваҡыт күп үтеүгә ҡарамаҫтан, МТС-та ер әҙ эшләнгән, ә икде тиҫтәләгән тракторҙар ватылып тик ултыралар. МТС етәкселәре тракторҙарҙы тиҙерәк стройға индереү өсөн бер ҙә ашыҡмайҙар. Калинин исемендәге колхозда трактор ҺабаҺынан төгәрмәс ваттан. Улы бер нисә сәғәт эсендә төҙәтергә мөмкин ине. Икес көн утҡас кенә иптәш Ғәсетҡулов тәгәрмәсте сәғәтләп бер һунһын ремонтлағасаҡ, тип хәбәр итте. Уның һуңда ике көн үтте. Колхоз председателе иптәш Гәрәев был көндәрҙә телефон аша ниндәй киткәнде, ләкин уға МТС-тан бер кем дә яуап бирмәне, сөнки бында колхоздар менән бәйләнешкә иш өсөн хатта ижтимағи күрһәтелгән...

Трактор бригадалары менән Байыш МТС етәкселәре бына шулай «эш итәләр». Дөрөҫ, улар колхоздарҙа була, көнөнә хатта 10—15 колхозды урап сығалар, ләкин был «оперативлелектән» был бер ни файҙа юҡ. Эштең ойошторолоуына һәм сифатына иғтибар бирелмәй. «Урал», «Юлдаш», «Правда», Тукай исемендәге колхоздарҙа тракторҙар менән һөрөлгән ерҙең тәрәнлеге 13 сантиметрҙан артмай.

Механизаторҙар араһында агитацион-массовый эш та бик насар алып барыла. СССР Верховный Советы Президиумының 1948—1949 йылдарҙа юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, ордендар һәм медалдар менән наградлау тураһындағы Указы тракторсыларға әле булһа еткерелмәгән. Калинин исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе трактористар Ғәсимов бер колхоздағы иштәрендә 10 көндә бер гәзит алғандар юҡ.

Тракторҙарҙың эштәрен ике сменала ойоштороу, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү тураһында МТС-та әле булһа уйланмайҙар. Дөйөм тукланыу ойошторолмаған, шул сәбәпле запасташар, һабан тураныулар ауылдарына ҡайтып йөрөйҙәр.

Быны беҙ былар бөтәһе лә шуға килтерҙе: был көнләк график хуҗалыҡлы рәүештә өҙөлдө. 1400 гектар урынына, 450 гектар ғына ер һөрөлдө, 1450 гектар урынына, 100 гектарға ғына сәсеү үткәрелде.

Ғ. Шәрипов.

Договор үтәлмәй

ҮРГЕ ҠЫЙҒЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район колхоздары һәм МТС-тар быйыл яҙ 8.700 гектар майҙанда ер һөрөргә һәм 13.000 гектар һабан аҫлыҡ культураларын сәсергә тейештәр. Сәсеү майҙанының артыуы колхоздарҙан, МТС-тарҙан бөтә көсте тулы файҙаланыуҙы, сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта үткәреү өсөн бөтә темпын бик ныҡ күтәреүҙе талап итә. Ләкин күпселек колхоздарҙа яҙғы сәсеү эштәрен барышы был талаптарға бөтөнләй яуап бирерлек түгел. Сәкин йәнле тартыу көстәре лә, машина-трактор паркы ла яҙғы сәсеүҙә әле булһа тейешенсә файҙаланылмай.

Әбйәҙәбр МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа сәсеү тик 6—8 майҙа ғына башланды.

Буденный исемендәге колхозды Ҡыйғы МТС-ы хеҙмәтләндерә. Был колхозҙың йәнле тартыу көсө бик аҙ. 225 гектар ер һөрөргә кәрәк. Бөтә нисбә тракторҙарҙа. Ләкин трактористар уны аҡлай алмайҙар. Бында иптәш Хәйруллин бригадаһының тракторҙары бағыуға 2 майҙа уҡ сыҡҡандар ҙа, тик 8 майға ғына һөрөргә тотондолар. Тормошола тракторҙар эшләүсе Зарипов һәм Ибатов иптәштәр бер ҙә юҡҡа ваҡыт эсендә яҙғы гектар ғына ер һөрөлгән. Трактористәр бригадаһы көйлә булмауынан зарлаһалар. Сәкин уҡ ҡытаҡ үҙ ҡыуылы колхоз председателе иптәш Исмәғилев уны Белокатай МТС-ына алып барып, колхоз иҫәбенә ремонтлатырға мәжбүр булды. Колхоз трактор өсөн бер гәҙ килограмм да ағыулыҡ юҡ.

— Яғыулыҡ өсөн һаулы ыуыш юҡ. Ә МТС вагары нәһә лә, һаман кәнәәһә ремонтаен, — ти колхоз председатели. — Ә МТС директоры иптәш Фәхретдинов:

— Иптәшгә лә тейәмәйем. Договорҙы колхоз ла мискләр бирер мисаллан карадлан. — тип кетә яуап ҡайтарад.

«Ҡыҙыл Урал» колхозында договор буйынса МТС-тың тағармәсле бер тракторы аҫлыҡ сәсеү өсөн билдәләнгән. Ул 16 гектар бойҙай сәсте. Ләкин трактор бригадаһы бригадиры Халимов:

— Был трактор көсһеҙ, ағыулыҡты күп расходлай, — тип уны эштән туҡтатты. Колхоз председателе иптәш Мөхәмәтнуров был һылтау итеп, 32 гектар майҙанда аңлыҡты ҡул менән сәсһәрҙе. «Берлек юл» колхозында 2 трактор ни бары 6 гектар ер һөрөгән һәм хәҙер улар ватылып ултыралар. «Һәнир» колхозында иптәш Смирнов етәкселек иткән бригаданың тракторҙары график буйынса көнөнә 18 гектар ер һөрөргә тейештәр. Ә улар 3 көнлә 50 гектар ғына ер һөрҙөләр. Быны баҫыу эше 3 майҙа уҡ башланыуға ҡарамаҫтан, ошо көнгә тиклем ер һөрөү 6 гектар ғына бойҙай сәселде. Был колхозда сәсеүҙе ашырыуға ҡулын эшләү, Дөйөм тукланыу ойошторолмаған, «Шулем», «Эһсей» һәм «Нур» колхоздарында ла шундай уҡ хәл.

Был фактылар бөтәһе лә Ҡыйғы районы МТС-тарының колхоздары алдындағы бурыстарын үтәмәүҙәрен, эштә бер етәкселек ҡылмаған сәсеүҙе ойошторлоуҙа ҙур етешһеҙлектәр тынлаҡтарын юҡ. Шулай уҡ ваҡытлы район ойошмалары ла һәм уларҙың етәкселәре лә сәсеүҙе ялан яҡшы алып бармайҙар.

Яҙғы сәсеүҙе ыҡтырыуға, алдынғыларҙың тәжрибәләрен таратыу, МТС-тар һәм колхоздар эшендәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡит итеүгә район гәзите «Коммунизмға» (редакторы иптәш Вәлиев) насар эшләй. Редакция телефон аша ғына тота. Гәзиттәге хәбәрселәр актив ойошторолмаған. Улар араһында эшләү эшмәгәйҙе. Бығаса алдынғы колхоздарҙың тәжрибәләре гәзит биттәрендә күрһәтелмәй.

Н. Ғәлимов.



Һүрәттә: Моторный МТС-ының трактористе иптәш И. Петров. Ул «Париж коммунаһы» колхозы (Өфө районы) баҫыуында көндәлек сәсеү нормаһын 120—125 процентҡа үтәй.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Һабансылар нормаларын арттырып үтәйҙәр

Әлшәй районы «Үрнәк» колхозында хеҙмәткә яраҡлы бөтә колхозсылар ҙа баҫыуҙа эшләйҙәр һәм уларҙың күптәре көндәлек эш нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Йәш һабансыларҙан иптәш Фазылов үгеҙҙәр менән һәр көндә бер гектар, иптәш Ниғмәтуллин 0,70 гектар ер һөрә. Сәскестә эшләүсе Зөләйхә Ҡамалова һәм Хасамов иптәштәр ҙә 5 гектар урынына, һәр көндә 6-шар гектар аңлыҡ сәсәләр.

Колхозсыларҙың тырыш эшләүҙәре һөҙөмтәһендә һуңғы ике биш көнлөк график арттырылып үтәлде. Бөтәһе 185 гектар бойҙай сәселде.

Ғ. Ғәйнетдинова

Алдынғы колхоздарҙа

Бәләбәй районының «Үрнәк», «Ҡыҙыл гөл», Салауат Юлаев һәм Чкалов исемендәге колхоздары 100—150-шәр гектар аңлыҡ сәстеләр. Чкалов исемендәге колхозда көнбағыш һәм борсаҡ сәсеү теүәлләнде.

Колхозсылар эштә юғары хеҙмәт күрһәткестәре бирәләр. «Ҡыҙыл юл» колхозында М. Кәлимуллина звеноһы члендарынан М. Шәмсетдинов һөрөүҙә, М. Ҡорбанов сәсеүҙә норманы 125 процентҡа үтәйҙәр. Чкалов исемендәге колхозда Р. Авзалов, Р. Хәмидуллин, Р. Әюпов һәм Салауат Юлаев исемендәге колхозда Л. Сәлихов, Р. Вәлиев, М. Саяхов, З. Насибуллин иптәштәр ҙә баҫыуҙа алғаа эшләйҙәр.

Н. Сафиуллин.

Етәкселекте көсәйтергә

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). 1 майҙан башлап ҡояшлы һәм йылы көндәр тора. Иртә культураларҙы сәсеү өсөн иң яҡшы ваҡыт. Ләкин Учалы районы колхоздары был ҡиммәтле шарттарҙы бик насар файҙаланалар, сәсеүҙе иҫ киткес аҡрын темп менән алып баралар. Сәсеүҙең графиге беренсе биш көнлөктә лә, икенсе биш көнлөктә лә үтәлмәне. 11.900 гектар урынына, 3677 гектар ғына ашлыҡ сәселде.

Күп кенә колхоз һәм район етәкселәре эштең былай аҡрыҡ барыуын сәсеү орлоғо етешмәүе менән аңлатмаҡсы булалар. Дөрөҫ, Миас, Магнитогорск элеваторҙарынан орлоҡ бик аҡрын ташыла, ул эшкә бер ни тиклем тотҡарлыҡ яһай. Ләкин төп сәбәп унда түгел: яҙғы сәсеүҙә ойошҡанлыҡ етешмәй, етәкселек йомшаҡ.

«Ҡыҙыл башаҡ» колхозында майҙың беренсе биш көнөндә йәнле тартыу көстәре менән бер гектар ҙа ер һөрөлмәне. Колхозды хеҙмәтләндергән ике трактор техник сәбәптәр менән ике тәүлек эшләмәй торҙо. Шуның һөҙөмтәһендә май айының беренсе декадаһында ни бары 52 гектар ашлыҡ сәселде. Ә график буйынса 400 гектар сәселергә тейеш ине.

Ҙур колхоздарҙан «Иҙәнгол» ауыл хужалығы артеле лә үн көнлөк графикте 9 процентҡа ғына үтәне. Колхоздағы 150 баш эш аты, 4 трактор сиктән тыш насар файҙаланыла. Аттар менән көнөнә бары тик 4 гектар, ә тракторҙар менән 15—25 гектар ғына ер һөрөлә.

«Комбайн» колхозында баҫыу эштәре айырыуса тарҡау бара. Баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Шәймарҙанов бригаданың күпме ер һөрөргә, күпме сәсергә һәм башҡа эштәр башҡарырға тейешлеген дә белмәй. Бында нәмә һәм күпме эшләгәнлеккә лә иҫәп алып барылмай. Ошондай уҡ хәлде «Ҡыҙыл маяҡ», «Ҡыҙыл таң», «Юшалы», «Яйыҡ» һәм башҡа колхоздарҙа ла күрергә мөмкин.

МТС-тар ҙа үҙ бурыстарын үтәмәйҙәр. Учалы МТС-ында ун көнлөк график 29, Байрамғол МТС-ында 31 процентҡа ғенә үтәлде. Тракторҙар тәүлектәр буйына эш юҡлыҡ сәбәптәр менән эшләмәйенсә тик торалар. Механиктар бригадаларҙа булмайҙар, ундағы хәл менән ҡыҙыҡһынмайҙар, танышмайҙар. Кәрәкле ярҙам да күрһәтелмәй. Трактор эштәре сифатһыҙ башҡарыла. «Үрнәк» колхозында эшләүсе Закиров бригадаһы һөрөү менән бер үк ваҡытта тырматыу үткәрмәй. Тәгәрмәсле тракторға 3, «НАТИ» тракторына 4 кенә ат тырмаһы тағылған.

Был берҙән-бер генә факт түгел. Агротехниканы боҙоу фактылары бик күп. Районның орлоҡсолоҡ хужалығы булған «Авангард» колхозында тракторист Фәррахов йомшаҡ ерҙе ни бары 13 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрә. «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозында 12 гектар, «Октябрь» колхозында 50 гектар майҙан 10 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрөлгән. Тырматыу сифаты ла бик түбән.

Район ауыл хужалығы бүлеге работниктары ла, МТС агрономдары ла трактор эштәре өҫтөнән контролде тәьмин итмәйҙәр. Улар колхоздарҙа һәм бригадаларҙа әллә ни ҙә бер күренәләр.

Күп кенә колхоздарҙа партия ойошмалары яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн агит-массовый эште, социалистик ярышты тейешенсә йәйелдермәйҙәр. «Үрнәк» колхозында партия ойошмаһы секретаре иптәш Ғабитов баҫыуҙа, һабансылар, тырмасылар, сәсеүселәр араһында бик һирәк була. Коммунистар яуаплы участкаларға ҡуйылмағандар. ВКП(б) райкомының колхоздарға ебәрелгән вәкилдәре быға иғтибар итмәйҙәр.

М. Хәйҙәров.

Партия тормошо

Цех партгруппалары

Черниковск химик заводының цехтарында тәүлек әйләнәһенә өҙлөкһөҙ эш ҡайнай. Вахталар тәүлеккә өс тапҡыр алмашына. Бындай шарттарҙа партия-политик эште системалы рәүештә алып барыу байтаҡ ҡатмарлана. Бөтә эште сменаларҙа алып барырға тура килә. Быны иҫкә алып, беҙ күпселек цехтарҙа партия группалары төҙөнөк. Был бик ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Начальнигы иптәш Зуенко булған цех партия группаһының тәжрибәһе айырыуса иғтибарға лайыҡлы. Партгрупорг иптәш В. П. Письменный үҙенең бурысын яҡшы аҡлай. Бөтә коммунистарға ла партия поручениелары бирелгән. Уларҙың күбеһе агитатор булып эшләй, һәр көн һайын эш алдынан йәки сменанан һуң эшселәр менән политик темаларға беседалар үткәрәләр, үҙҙәренең сығыштарын цехтың һәм бөтә заводтың тормошо менән бәйләп алып баралар. Эшкә көн һайын йомғаҡ яһала, һәр бер сменаның күрһәткестәре проценттарҙа ғына түгел, бәлки һумдарҙа ла иҫәпкә алына. Шул арҡала был цех социалистик ярышта ғүзәл еңеүҙәргә өлгәште. Хәҙер инде ул бер нисә ай буйына беренсе урынды алып килә. Эшселәрҙең 94 проценте стахановсылар.

Смена начальнигы иптәш Шестаков етәкселек иткән партгруппа планды ваҡытында үтәлеүенә өлгәшеү өсөн цех етәкселәренә ышаныслы ярҙам күрһәтә. Ул механизмдарҙың торошон үҙ контроле аҫтына алды, уларға ваҡытында техник тәрбиә яһауҙы ойошторҙо. Һөҙөмтәлә цех апрель айы планын 125 процентҡа еткереп үтәне.

Партгрупорг иптәш Писарев коллективтың иғтибарын оборудованиеларҙың тик тороуына ҡаршы көрәшкә йүнәлтте. Цехты сырье менән тәьмин итеү ҡыйынлашҡайны. Партгруппа нефть эшкәртеү заводының һелте отходтарын сырье сифатында ҡулланыуҙы практикаға индерҙе. Был, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын байтаҡ кәметеүгә, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә һәм тәүлек заданиеларын арттырып үтәүгә мөмкинлек бирҙе.

Завод управлениеһе партия группаһы ла производство тормошонда актив ҡатнаша башланы. Үҙенең коммунистары аша ул массовый рәүештә техник уҡыуҙар ойошторҙо. Махсус белеме булмаған мастер-практиктар дөйөм белем күтәреү группаһына йәлеп ителделәр. Техник хәүефһеҙлек буйынса күп кенә лекциялар ойошторолдо.

Партия группалары цехтарҙа массаны ысын мәғәнәлә ойоштороусылар, производство командирҙарының ышаныслы таяныстары булып әүерелделәр. Коммунистар биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәштең башында торалар, үҙҙәренең шәхси эш өлгөләре менән эшселәрҙе ауырлыҡтарҙы еңеп сығыуға дәртләндерәләр.

Завод партия ойошмаһы, цех партия группаларын нығытып һәм уларҙың ролдәрен күтәреп, улар аша эшселәр коллективы менән ныҡлы бәйләнеш булдырҙы. Партия ойошмаһы хәҙер эшселәрҙең ихтыяждарын, теләктәрен һәм талаптарын ваҡытында белеп тора. Был партия-политик эште йөкмәткелерәк итеп алып барырға, массаларҙы идеологик яҡтан тәрбиәләү эшен яҡшыртырға мөмкинлек бирҙе.

Партбюро цех партгрупоргтары менән систематик рәүештә семинарҙар, кәңәшмәләр үткәрә, тәжрибәләр менән уртаҡлашыуҙы ойоштора, цехтарҙа, сменаларҙа һәм бригадаларҙа партия-политик эште ойоштороу практикаһы тураһында беседалар үткәрә.

Ошо көндәрҙә партбюро ултырышында партия группаларының эшендәге ыңғай тәжрибәләр дөйөмләштерелде һәм булған етешһеҙлектәр асылды. Уларҙың эшен артабан яҡшыртыуға йүнәлдерелгән конкрет ҡарар ҡабул ителде. Партбюро ҡарары партия группаларының йыйылыштарында тикшерелде.

Производствоның хәл иткес участкаларында партия группалары төҙөү практикаһы үҙен тулыһынса аҡланы. Партгруппалар бөтә коллективты партия йоғонтоһо менән солғап алыуға ярҙам итәләр. Ә массовый-политик эште көсәйтеү социалистик ярышта һоҡландырғыс уңыштарға килтерә. Быны завод коллективының беренсе квартал планын 110,7 процентҡа үтәүендә, дүрт айлыҡ планды 19 апрелдә үк тамамлауында бик асыҡ күреп була. Шуның менән бергә, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 17 процентҡа кәмене. Завод государство дотацияһын алмайынса эшләй башланы.

Партия-политик һәм партия-ойоштороу эштәрен артабан яҡшыртыу һәм уны хужалыҡ эштәре менән дөрөҫ яраштырып алып барыу — сталинса яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәштең хәл иткес факторы булып тора.

М. Струков,
Черниковск химик заводының партбюро секретаре.

Партия уҡыуҙарының йомғаҡтары

Ағымдағы уҡыу йылында Ҡандра районында киске партия мәктәбе, 12 политик мәктәп һәм 18 түңәрәк эшләне. Район партия ойошмаһы быйыл партия уҡыуҙарын, үҙгән йылдарға ҡарағанда, күп тапҡырҙар яҡшы ойошторҙо. Күпселек политик мәктәптәр һәм түңәрәктәр занятиеларҙы регуляр рәүештә үткәреп килделәр һәм эштәрен программа материалдарын үтеп бөтөп тамамланылар.

Политик мәктәптәрҙә һәм түңәрәктәрҙә үткәрелгән һынауҙарҙа уҡыусыларҙың 80 проценттең үтелгән материалдарҙы яҡшы үҙләштергәнлектәре беленде.

«Яҡты юл», «Яңы йондоҙ» колхоздары эргәһендә ойошторолған һәм ВКП(б) райкомы пропагандисе иптәш Ғиззәтуллина етәкселек иткән политик мәктәп һәм түңәрәк эштәрен айырыуса яҡшы күрһәткестәр менән тамамланы.

Район партия мәктәбен 25 кеше тамамлап сыҡты.

Ғ. Ғәзизуллина.

Агитаторға ярҙамға

Ауыл хужалығы алдынғыларына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме ниндәй уңыштар өсөн бирелә

1948 йылдың 24 апрелендә «Бойҙайҙан, арыштан, ҡукуруҙҙан, доғонан, мамыҡтан, шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алған өсөн колхозсыларға, МТС һәм совхоз работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендары һәм медалдары менән наградлау тураһында» СССР Верховный Советы Президиумының Указы сыҡты. Һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреүҙә тарихи әһәмиәткә эйә булған был тағы бер мөһим Указ социалистик ауыл хужалығы эшселәрен яңы культуралы уңыштарға рухландырҙы.

Ауыл хужалығының төп культураларынан юғары урожай үҫтереүҙе игенселекте артабан алға ебәреүҙә иң мөһим бурыс булып торғанын иҫкә алып, СССР Верховный Советы Президиумы ауыл хужалығы работниктарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, уларҙы ордендар һәм медалдар менән наградлау өсөн үткән йылдарға ҡарағанда юғарыраҡ күрһәткестәр ҡабул итте.

Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыу өсөн ауыл хужалығы алдынғылары урожай үҫтереүҙә ниндәй күрһәткестәргә өлгәшергә тейештәр һуң?

Советтар Союзының көнсығыш райондарында, шул иҫәптән Башҡортостанда, колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларындағы звеноводтар Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыу өсөн 20 гектар бойҙай йәки арыш майҙанының һәр гектарынан 29 центнер урожай алырға тейештәр. Шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүсе звеноводтар 3 гектар майҙандың һәр гектарынан 550 центнер урожай алырға, көнбағыш үҫтереүсе звеноводтар 10 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 20 центнер урожай алырға, үлән сәсеүлектәрен үҫтереүсе звеноводтар 5 гектар сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 5 центнер клевер йәки 5 центнер люцерна йәки 6 центнер тимофеевка орлоғо урожайы алырға тейештәр.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙары Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен алыу өсөн һәр гектарҙан юғарыла күрһәтелгән урожайҙы түбәндәге майҙандан алырға тейештәр: бойҙай һәм арыш (бергә) — 60 гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 10 гектар, көнбағыш — 30 гектар, клевер — 10 гектар, люцерна — 15 гектар, тимофеевка — 10 гектар.

Колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоздарҙың бүлексә (ферма) управляющийҙары, агрономдары, механиктары, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористары Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыу өсөн 150 гектар бойҙай һәм арыш (бергә) майҙанының һәр гектарынан 29 центнер йәки 20 гектар шәкәр сөгөлдәренең һәр гектарынан 550 центнер, 60 гектар көнбағыштың һәр гектарынан 20 центнер урожай алырға бурыслылар. Ә үлән сәсеүлектәренән: 20 гектар клеверҙең һәр гектарынан 5 центнер, 20 гектар люцернаның һәр гектарынан 5 центнер, 20 гектар тимофеевканың һәр гектарынан 6 центнер үлән орлоғо урожайы алыу талап ителә.

Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктары Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыу өсөн юғарыла күрһәтелгән һандағы урожайҙы түбәндәгесә майҙандан алырға тейештәр: бойҙай һәм арыш (бергә)—300 гектар, шәкәр сөгөлдөрө—50 гектар, көнбағыш—100 гектар, клевер—60 гектар, люцерна—75 гектар, тимофеевка—60 гектар.

МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙарына һәм трактористарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме алыу өсөн үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 250 гектар бойҙай һәм арыш майҙанының һәр гектарынан 22 центнер урожай алыу кәрәк, 65 гектар шәкәр сөгөлдөренең һәр гектарынан 380 центнер, 130 гектар көнбағыштың һәр гектарынан 19 центнер, 50 гектар клеверҙең һәр гектарынан 4,2 центнер орлоҡ, 75 гектар люцернаның һәр гектарынан 4,5 центнер орлоҡ, 50 гектар тимофеевканың һәр гектарынан 5 центнер орлоҡ урожайы алыу талап ителә. Ә МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктары урожайҙың шул уҡ күрһәткестәрен түбәндәге күләмдәге майҙандан алырға тейештәр: бойҙай һәм арыш (бергә) — 500 гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 130 гектар, көнбағыш—200 гектар, клевер—100 гектар, люцерна—150 гектар, тимофеевка—100 гектар.

МТС директорҙарына, өлкән агрономдарына, өлкән механиктарына 1000 гектар бойҙай һәм арыш майҙанының һәр гектарынан 20 центнер урожай алған хәлдә, уларға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә. Был почетлы исем уларға шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан, клеверҙан, люцернанан һәм тимофеевканан юғары урожай алғандары өсөн дә бирелә. Бының өсөн 300 гектар шәкәр сөгөлдөрөнөң һәр гектарынан 230 центнер, 400 гектар көнбағыштың һәр гектарынан 16 центнер, 200 гектар клеверҙең һәр гектарынан 4 центнер орлоҡ, 300 гектар люцернаның һәр гектарынан 4 центнер орлоҡ, 200 гектар тимофеевканың һәр гектарынан 4,5 центнер орлоҡ урожайы алырға кәрәк.

Ваҡ колхоздарҙың бойҙай һәм арыш культуралары майҙаны 150 гектарға етмәй икән, ул майҙан 40 гектарҙан да кәм булмаған хәлдә, әгәр ҙә колхоз һәр гектарҙан Указда күрһәтелгән күләмдә юғары урожай алһа, колхоз председателе Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн күрһәтелә.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың алдынғыларын Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреүгә тапшырыу өсөн колхоз һәм совхоз урожайҙы планда күрһәтелгәндән 10 процентҡа артыҡ алырға, ә звено үҙ сәсеүлегенең ҡалған бөтә майҙанынан, беркетелгән бөтә культуралардан да урожайҙы планда күрһәтелгәндән 10 процентҡа артыҡ алырға тейеш. Колхоз һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары, колхоздар, совхоздарҙың бүлексәләре (фермалары), совхоздар бөтә ҡалған майҙандан һәм бөтә культуранан урожайҙы планда күрһәтелгәндән 10 процентҡа күберәк алырға тейештәр.

Колхоз бөтә культуралар буйынса ла игендең мәжбүри тапшырыу планын, контрактация һәм МТС-тар эше өсөн натуралата түләүҙәрҙе тулыһынса үтәгән һәм бөтә культуралар буйынса ла киләһе йыл өсөн етерлек орлоҡ туплаған булһын. Совхоздар государствоға ауыл хужалығы продукттары тапшырыу планын үтәгән һәм орлоҡ менән үҙен тәьмин иткән булһын.

МТС-тарҙың директорҙарына, өлкән агрономдарына, өлкән механиктарына, трактор бригадалары бригадирҙарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн МТС хеҙмәтләндергән колхоздар урожай алыу планын 5 процентҡа арттырып үтәгән булырға, государствоға иген поставкаларын, контрактация һәм натуралата түләүҙе тулыһынса үтәгән, орлоҡ менән үҙен тәьмин иткән булырға тейештәр. МТС трактор эштәренең планын тулыһынса үтәгән булһын. Тракторсыға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн юғарылағы дөйөм күрһәткестәрҙән башҡа тракторист үҙе, бригадала уртаса ер эшкәртеү күләменә ҡарағанда, 25 процентҡа күберәк ер эшкәртергә бурыслы.

МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың комбайнерҙарына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү өсөн комбайнер 25 эш көнөндә «Коммунар» йәки «С—4» маркалы үҙе йөрөй торған комбайн менән 7 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 1 мең центнер майлы культураларҙы һуғып алырға, ә «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайндарында эшләгәндә ул шул уҡ срокта, 8500 центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 1500 центнер майлы культураларҙы һуғып алырға тейеш.

Яңы Указ социалистик ауыл хужалығын артабан күтәреүҙә ҡеүәтле ҡорал булып тора. Ул колхозсыларҙы, МТС һәм совхоз эшселәрен яңы подвигтарға саҡыра, илебеҙҙең экономик ҡеүәтен тағы ла арттырыу өсөн фиҙакәр көрәшкә мобилизовать итә.

З. Бәхитов.

Грецияла грек демократтарын үлтереүгә ҡарата Совет Хөкүмәтенең белдереүе

Билдәле булғанынса, һуңғы ваҡыттарҙа Грецияла грек демократтарын эҙәрлеү бик киң күләмдәр алды һәм унда грек патриоттары массовый рәүештә үлтерелә. Улар араһында немец илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә актив ҡатнашҡан кешеләр күп.

Был айҙағы Советтар Союзының Афиналағы эшҡорҙа Поверенныйы иптәш Н. П. Черкышев, Совет Хөкүмәтенең тапшырыуы буйынса, Греция сит ил эштәре министры Цалдарисҡа түбәндәге белдереүҙе тапшырҙы:

«Совет Хөкүмәте хәҙерге ваҡытта Грецияла грек демократтарының үлтерелеүенә совет халҡының нәфрәт белдергәнлегенә Греция хөкүмәтенең иғтибарын йүнәлтеүҙе кәрәк тип һанай. Үҙ ваҡытында Германия оккупанттарына ҡаршы көрәшкән грек патриоттарын үлтереүҙәр цивилизациялы донъя күҙе алдында бер нисек тә аҡлана алмайҙар. Совет общественносе, халыҡтарҙың выжданын нәфрәтләндереүсе был үлтереүҙәрҙең, һис кисекмәҫтән, туҡтатылыуын көтә. Совет Хөкүмәте совет общественносеның был тойғоларын тулыһынса уртаҡлаша». (ТАСС).

Инженер Юшиндең ҡиммәтле тәҡдиме

КИЕВ. (ТАСС). Киев ауыл хужалығы өлкә управлениеһенең өлкән инженеры А. А. Юшин трактор моторында осҡон табыу һәм яҡтыртыу өсөн динамомашинаһы, магнетоның электр энергияһын бер үк ваҡытта файҙаланыу юлы менән тракторҙарҙы электр яҡтылығы менән тәьмин итеүҙе маҡсат итеп ҡуйғайны. Был бурысты ул уңышлы үтәне. Ҡатмарлы булмаған ҡулайлаштырыу ярҙамында иптәш Юшин Сперск һәм Киев-Святошинск МТС-тарының бер нисә тракторын яҡтылыҡ менән тәьмин итте.

Хәҙер ауыл хужалығы өлкә управлениеһенең инженерҙары иптәш Юшиндең тәҡдимен өлкәнең бөтә МТС-тарына ла күсереү сараларын күрәләр.

Украина колхоздарына кредиттәр

1948 йылға Украина ауыл хужалығына государство кредите биреү планы раҫланды.

Республика колхоздары быйыл төҙөләш өсөн, мал, ауыл хужалығы инвентарҙәре һәм минераль ашламалар һатып алыу өсөн, шулай уҡ башҡа производство ихтыяждарына, үҙгән йылға ҡарағанда, 20,5 миллион һум артығыраҡ суммала оҙаҡ срокло кредит аласаҡтар. Совет Армияһынан демобилизацияланып ҡайтҡан воиндарға, Ватан һуғышы инвалидтарына торлаҡтар төҙөү, колхозсыларға һыйыр алыу өсөн һәм күсенеүселәргә ярҙам итеү өсөн унарлаған миллион һум кредит бирәсәк.

(ТАСС).

Экономия режиме—хужалыҡ итеүҙең социалистик методы

«Минеңсә, кешелек тарихында коммунистик обществонан да һаҡсылыраҡ общество юҡтыр. Һәм был тәбиғи ҙә. Сөнки тик коммунистик обществола ғына средстволар менән эш итеү, расходлау уларҙы етештереүселәр ҡулында. Мин, средстволарҙы үҙҙәре етештереүселәр уларҙы тотоноуҙа эксплоататорҙарға ҡарағанда, йәки башҡа кеше хеҙмәтен баҫып алыусыларға ҡарағанда һаҡсылыраҡ икәнлеген иҫбат итеп тороуҙың айырыуса кәрәге юҡ тип уйлайым», — тигәйне М. И. Калинин үҙенең докладтарының береһендә. Михаил Иванович Калининдең был һүҙҙәрен һәр бер хужалыҡсы хәтерендә бик ныҡ һаҡларға тейеш.

Совет халҡы предприятиеларҙан продукция эшләп сығарыуҙы арттырыуҙы, уның сифатын яҡшыртыуҙы һәм үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуҙы талап итә. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡының юғары булыуы предприятиеның насар эшләгәнен, экономия режименең булмауын күрһәтә.

Етештереү процесе өс төп фактор менән: хеҙмәт ҡоралы, хеҙмәт әйберҙәре һәм кешенең маҡсатҡа йүнәлтелгән хеҙмәте менән билдәләнә. Хеҙмәт ҡоралы менән хеҙмәт әйберҙәре кешенең әйбергә әүерелгән хеҙмәтенең һөҙөмтәһе ул. Продукцияның хаҡы был продукцияны етештереү өсөн кәрәкле булған общественный хеҙмәт менән билдәләнә. Продукцияны етештереүгә киткән общественный кәрәкле хеҙмәт ни тиклем күберәк экономияланһа, продукцияның хаҡы ла шул тиклем түбән була. Шуға ярашлы рәүештә экономия режиме түбәндәге төп күрһәткестәрҙә: хеҙмәт ҡоралын тотоноуҙа экономия яһауҙа, хеҙмәт әйберҙәрен тотоноуҙа экономия яһауҙа, яңы продукцияны етештереү өсөн киткән хеҙмәт ваҡытын экономиялауҙа булырға тейешле.

Экономия режиме методын, йәғни эш ҡоралын, әйберҙәрҙе һәм хеҙмәт ваҡытын экономиялы расходлауҙы ҡайһы участкаларҙа ҡулланырға кәрәк һуң? Етештереүҙә конструкторлыҡ әҙерлегенән башлайыҡ. Экономия режиме өлкәһендә инженер-конструкторҙың бурысы конструкциялауҙың срогын ҡыҫҡартыуҙан һәм яңы өлгөнө производствоға мөмкин тиклем тиҙерәк индереүҙән, деталдәрҙең һанын кәметеүҙән, деталдәрҙең геометрик формаларын ябайлаштырыуҙан, металл маркаларының һанын кәметеүҙән һәм алыҫтан килтерелә торған материалдарҙы мөмкин тиклем аҙ йәки бөтөнләй ҡулланмауҙан тора. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында инженер-конструкторҙар был өлкәлә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Илебеҙҙәге заводтарҙың береһендә конструкторҙар тик бер изделие буйынса ғына деталдәр һанын 900 данаға һәм ул изделиене етештереүҙә кеше хеҙмәтен 38 процентҡа кәметтеләр. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү осорында был эш тағы ла көсәйтелергә тейешле.

Производствоны технологик яҡтан әҙерләү өлкәһендә экономия режиме методы айырыуса киң ҡулланылырға тейешле. Инженер-технологтар технологияны өҙлекһеҙ камиллаштырырға тейештәр. Һәр бер яңы технология продукция етештереүҙең үҫеүен, продукцияның сифатын яҡшыртыуҙы, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын арзанайтыуҙы тәьмин итһә генә ул ҡиммәтле була. Ошо талаптарға яуап бирмәгән яңы технология ҡабул ителмәҫкә тейеш.

Технологияны тамырынан үҙгәртеү: деталдәрҙе шыйыҡ металдан штамповать итеү, термик юл менән эшкәртеүҙә юғары тиҙлектәге токтарҙы ҡулланыу һәм башҡалар заводтарҙың эш практикаһында бик яҡшы һөҙөмтәләр бирә. Мәҫәлән, Черниковск машиналар төҙөү заводында термик юл менән эшкәртеүҙә юғары тиҙлектәге электр тоғын ҡулланып, бер әйберҙе етештереүҙең ваҡыты 16 сәғәттән 4—5 секундҡа тиклем ҡыҫҡартылды. Экономия режиме ҡулланыу мөмкинлеге производствоны технологик яҡтан әҙерләү өлкәһендә бигерәк тә күп.

Баш механик бүлеге работниктары ла шулай уҡ экономия режиме методын ҡулланырға тейештәр. Уларҙың эше нимәнән тора? Баш механик бүлеге деталдәрҙе һәм изделиеларҙы алыҫҡа күсереп йөрөтөүҙе булдырмаҫ өсөн цехтарҙа станоктарҙы һәм оборудованиене дөрөҫ һәм уңайлы итеп урынлаштырыуҙы күҙәтә. Был бүлек оборудованиеларҙың тулы ҡеүәтендә файҙаланылыуҙы күҙәтергә, буш тороуҙарҙың сәбәптәрен тикшерергә һәм уларҙы бөтөрөү өсөн саралар күрергә тейеш. Оборудованиеға планлы рәүештә иҫкәртеү ремонты яһап һәм ремонтлауҙа тиҙләтелгән методтар ҡулланып, баш механик бүлеге продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн шарттар тыуҙыра.

Инструменттар бүлеге экономия режименә ҙур өлөш индерә ала. Предприятиене үҙенә төшөү хаҡы арзан булған яҡшы сифатлы тейешле инструменттар менән тәьмин итеү — был бүлектең бурысы бына шул. Баш инженеры иптәш Васильев булған заводтың инструменттар бүлеге, инструменттарҙың үҙенә төшөү хаҡын байтаҡ кәметеп, экономия режименә үҙенән тейешле өлөштө индерә бара.

Техник контроль бүлеге лә, башҡа бүлектәр кеүек үк, экономия режиме өсөн көрәшергә тейеш. Брак булдырмау өсөн алдан саралар күреү, брак яһауға ғәйепле кешеләрҙе табыу юлы менән техник контроль бүлеге бракты кәметеүгә, тимәк продукция эшләп сығарыуҙы арттырыуға һәм уның үҙенә төшөү хаҡын кәметеүгә ярҙам итә.

Тәьминәт бүлеге работниктары үҙ эштәрендә экономия режиме принциптарына таянырға тейештәр. Материалдар һатып алыуға һәм әҙер продукцияны оҙатыуға үҙ ваҡытында договорҙар төҙөшөү, әҙер продукцияны үҙ ваҡытында оҙатыу һәм бында мөмкин тиклем аҙ расход сығарыу, складтарҙа материалдарҙың тейешле запасын булдырыу, цехтарҙы тейешле материалдар менән тәьмин итеү — хужалыҡ итеүҙә экономия режиме методын һаҡлауҙа ҙур роль уйнайҙар.

Эшләп сығарыу программаһын үтәүҙә төп фактор булыуы яғынан эшсе көсөн урынлаштырыуға айырыуса иғтибар бирелергә тейешле. Эшсе көсөнә булған ихтыяжды аныҡ иҫәпкә алыу, кадрҙарҙы эшлеклелек билдәләренә ҡарап һайлап алыу, уларҙы һәләтлектәренә ҡарап урынлаштырыу, эшсе көсөнөң ағымсылығына ҡаршы көрәшеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн систематик рәүештә техник һәм ойоштороу юлдарын эҙләү, эш урынын рациональ рәүештә ойоштороу, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу — хеҙмәттә һәм ваҡытты экономиялауҙың асылы бына шунда. Аҙаҡ иҫәптә хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә килтерә, а был айырым тәр продукцияны эшләп сығарыуҙа хеҙмәтте экономиялау тигән һүҙ.

Производствоны идара итеүҙең ойоштороу методтарын: цехтарҙа хужалыҡ иҫәбе, өҙлекһеҙ ағылыш методы, социалистик ярыш, эшселәрҙең квалификацияларын күтәреү, средстволарҙы экономиялау өсөн ҙур мөмкинлектәр тыуҙыра. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү планы буйынса эшләп сығарыуҙың күләмен арттырыу ғына түгел, бәлки предприятиеның бөтә экономик эшмәкәрлегенең яҡшыртыу, эске ресурстарҙы максималь файҙаланыу, производство расходтарын ҡыҫҡартыу, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 17 процентҡа кәметеү күҙҙә тотолған. Промышленноста, ауыл хужалығында һәм транспортта производство расходтарын кәметеүҙән алынған экономия биш йыллыҡ эсендә 160 миллиард һум тәшкил итәсәк. Был сумма 1913 йылғы тотош халыҡ доходынан ете тапҡырға артыҡ тип әйтерлек, РСФСР-ҙың 1946 йылғы Государство бюджетынан биш тапҡырға тип әйтерлек артыҡ.

Биш йыллыҡ эсендә алынырға тейешле экономия ана шулай.

Завод, фабрика, совхоз етәкселәренең һәм уларҙың тотош коллективтарының бурысы, производствола экономия режиме методтарын киң ҡулланып, шуның менән илебеҙҙең экономик ҡеүәтен тағы ла күберәк нығытыуҙы тәьмин итеүҙән тора.

П. Д. Мирко,
доцент, экономик фәндәр кандидаты.

Яңы биш йыллыҡ төҙөлештәрендә

Ҡарлыман шәкәр заводы ни өсөн акрын төҙөлә?

Быйыл йылғы буйында Ҡарлыман шәкәр заводы төҙөлә. Уны төҙөү эштәре Ватан һуғышына тиклем үк башланғайны. Ләкин һуғыш йылдарында ул ваҡытлыса туҡтатылып торҙо. Хәҙер төҙөү эше яңынан башланды.

Завод ҙур промышленносендә уның тотаһы һәм уны төҙөү государство әһәмиәтендәге мөһим сала булып тора. Төҙөлеш майҙанында хәҙер бер нисә тиҫтә матур итеп эшләнгән торлаҡ йорттары, Ремонт-механик мастерской, кирбес заводы, чиловой станция һалынды. Төҙөлеш управлениеһе эсен бина һалынған. Культура һәм көнкүреш биналары: клуб, столовой, магазин, мунса, балалар баҡсаһы биналары төҙөлгән. Ярҙамсы хужалыҡ һәм башҡалар ойошторолған.

Былар яҡшы, әлбиттә. Ләкин заводтың үҙен төҙөү эше сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәгәнлек темп менән бара. Ә һуғыштан һуңғы ике йыл эсендә төҙөлеш эшен киң йәйелдерергә мөмкин ине.

«Сахаростройҙың» Зигунов, Воробьев һәм Баязитов иптәштәр етәкселек иткән төҙөлеш-монтаж управлениеһенең насар эшләүе төҙөлеш темпының сиктән тыш түбән булмуында төп сәбәп булып тора. Насар етәкселек арҡаһында хужалыҡһыҙлыҡ киң урын ала, күп мәлдарға бик әксә артыҡ расходлана. Тик һуңғы ес йылда ғына 3.400 мең һум зарар күрелгән.

Ағымдағы йылда ла төҙөлештә бер ниндәй ҙә һынылыш һиҙелмәй. Ғинуар һәм февраль айҙарында планын бары тик 22 процентҡа ғына үтәлде һәм ике айҙа ғына государствоға 88 мең һум зыян килтерелде.

Хәҙер ҙә айҙарында төҙөлеш эштәре бөтә киңлегендә алып барылырға тейеш ине. Ләкин практикала ул юҡ.

— Материал юҡлыҡтан тик торабыҙ...

Төҙөлеш начальнигы Зигунов һәм инженер Воробьев иптәштәр бик борсолмай ғына шулай тиҙәр. Ләкин, материалдар етешмәй. Ағымдағы йылда төҙөлешкә талап ителгән 1 миллион кирбестән әле береһе лә юҡ. Төҙөлеш площадкаһында кирбес заводы ғына насар эшләй. Завод үткән йылда 500 мең урынына бары тик 95 мең кирбес бирҙе. Ә хәҙер ул бөтөнләй эшләмәй. Кирбес киптереү һарайҙары ярҙамсы хужалыҡтың фермаһына әйләндерелгән, а гофман мейесендә сүп-сар менән тулған.

Кирбес заводы төҙөлештең үҙ ҡарамағында һәм кирбес эшләү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар. Шулай булғас, етәкселәрҙең «материал юҡлыҡҡа» зарланмауҙары нигеҙһеҙ. Материалдар етешмәүҙә етәкселәрҙең государство алдында яуаплылыҡ һиҙмәүҙәре менән генә аңлатырға мөмкин.

Төҙөлештә ағас материалдары ла етешмәй. Был да етәкселәрҙең кемдеңдер әҙер ағас килтереп биреүен көтөп тороу арҡаһында килеп тыуған хәл. Шулай булмаған-да 1947—48 йылғы сезонда 5 мең урынына тик 480 кубометр ғына ағас әҙерләү менән сикланмаҫ инеләр. Ә ер эштәрен йылдарҙан йыл ни ҡамасаулай һуң? Был эш төҙөлеш материалдары талап итмәй бит. Ләкин быйыл беренсе кварталда ер эштәре планы 33 процентҡа ғына үтәлде. Был факт етәкселәрҙең һылтаныуҙарын кире ҡаға. Әгәр етәкселәр тейешле хәстәрлек күргән булһалар, төҙөлештә цемент, сортлы ҡалай, түбә ҡалайҙары, балкалар менән тәьмин итеүҙә лә һынылыш булыр ине.

Төҙөлеш темпының түбән булыуында, хужалыҡһыҙлыҡ һәм төрлө тәртипһеҙлектәр йәшен килеүҙә партия ойошмаһы ла ғәйепле. Сөнки партия ойошмаһының секретаре иптәш Баязитов үҙенең эшен управлениеның хужалыҡ эшмәкәрлегенә контролде көсәйтеүгә юнәлтеп ҡормаған. Төҙөлештә политик-массовый эштәр бөтөнләй алып барылмай, тип әйтерлек. Партия ойошмаһы үҙенең члендарының идея-политик кимәлен, производствола авангардлыҡ ролдәрен күтәреү мәсьәләһе менән шөғөлләнмәй. Иптәш Баязитов үҙенең бөтә эшен бюро ултырышы, йыйылыш үткәреү менән генә сикләй.

Төҙөлештә күп кенә алдынғы эшселәр бар. Улар, намыҫлы хеҙмәттәре менән күп ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, яҡшы эш өлгөләре күрһәтәләр. Мәҫәлән, столярҙар Я. Черемискин, В. Иванников иптәштәр нормаларын 200 процентҡа үтәйҙәр. Ташсы Золотых һәр сменала 20 мең кирбес һалыуға өлгәшә. Бәлтә осталары Н. Хәсәнов, М. Кәримов һәм А. Абдеев иптәштәр смена заданиеларын 1,5 норманан күп үтәгәндәр. Ләкин төҙөлеш темпын көсәйтеүҙә мөһим сығанаҡ булған был алдынғыларҙың эш өлгөләрен бөтә массаның достояниеһы итеү өсөн берни ҙә эшләнмәй. Социалистик ярыш мәсьәләһе менән бер кем дә шөғөлләнмәй. Былар шулай уҡ партия, профсоюз ойошмаларының эш етешһеҙлеге булып тора. Сөнки улар алдынғыларҙың тәжрибәләрен популярлаштырыусы, социалистик ярышты ойоштороусы булырға тейеш инеләр.

Ҡарлыман шәкәр заводын төҙөү темпын ҡырҡа көсәйтеү, уны төҙөү эшен быйыл илкәүҙә тамамлау төҙөлеш-монтаж управлениеһе етәкселәренең кискен бурысы булып тора. Быны тамам итеү өсөн бөтә средство, материал база етәрлек. Йәшен килгән хужалыҡһыҙлыҡҡа, государство средстволарын әрәм итеү ваҡиғаларына ҡырҡа сик ҡуйырға, механизмдарҙан тулыһынса файҙаланыуҙы ойошторорға, эште оператив етәкселектә булдырырға кәрәк.

ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы район комитеты ла төҙөлеш-монтаж управлениеһенең эшенә контролде ярҙамлы, етәкселәргә ҡарата талапсанлыҡты көсәйтергә бурыслы.

А. Кальметьев.

Яңы китаптар

Башҡорт Государство Издательствоһы И. Сталиндың «ВКП(б) Үҙәк Комитетенең эше тураһында партияның XVIII съездына отчет доклады» башҡорт телендә баҫып сығарҙы. Тиражы 5000. Был брошюра, Башҡорт Государство Издательствоһының 1948 йылғы тематик планына индерелгән марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәренең баҫылып сыҡҡан өсөнсө китап. Бынан элегерәк И. В. Сталиндың «Ауылда эшләү тураһында» һәм «Алдынғы комбайнерҙарҙың һәм комбайнер ҡатын-ҡыҙҙарҙың ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм хөкүмәт члендәре менән булған кәңәшмәһендәге телмәр», «Тажикстандың һәм Төркмәнстандың алдынғы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының партия һәм хөкүмәт етәкселәре менән булған кәңәшмәһендәге телмәр» тигән брошюралары баҫылып сыҡты.

Ә. Йомағужин.

Искусство хроникаһы

Симфоник концерт

Башҡорт опера һәм балет театры үҙ симфоник концертын әҙерләп алып бара. Был, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең тарихи ҡарарынан һуң, классик һәм башҡорт совет композиторҙарының симфоник музыкаларын популярлаштырыуҙа беренсе аҙым буласаҡ.

Концерт ике бүлектән әҙерләнә. Тәүге бүлек программаһында композитор Х. Әхмәтов симфонияһының беренсе бүлеге, композитор Р. Мортазиндең «Айбик» операһының увертюраһы үҙәк урында торалар. Был ике әҫәр — йәш композиторҙарҙың Мәскәү консерваторияһының композиторҙар студияһын тамамлағанда диплом яҡлап яҙған әҫәрҙәре.

ЯҢЫ ОПЕРА

Башҡорт совет композиторы Рәүф Мортазин, Б. Бикбай либреттаһы буйынса, «Айбик» исемле опера яҙып бөттө. Опера дүрт шаршауҙа булып, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының башланғыс осорында башҡорт крәҫтиәндәренең тормошон сағылдырыуҙы эсенә ала.

Май аҙаҡтарында операны ҡабул итеү буласаҡ.

«БӨЙӨК МӨХӘББӘТ»

Башҡорт Академия драма театры Н. Березконың иң яҡшы драма әҫәрҙәренә үткәрелгән Бөтә Союз конкурсында бүләкләнгән, «Бөйөк мөхәббәт» исемле пьесаһын әҙерләп бөттө. Пьесаны Мәскәү Государство Театраль Институтын тамамлаусы йәш режиссер Шәүрә Мортазина ҡуя.

Был — уның диплом яҡлау спектакле. Постановканы ҡабул итеү өсөн Мәскәүҙән искусство работниктәре киләсәк.

«Бөйөк мөхәббәт» спектаклендә театрҙың иң күренекле көстәре: РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы А. Мөбәрәков, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы З. Бикбулатова, БАССР халыҡ артисы Ғ. Ҡарамышев, атҡаҙанған артист Р. Сыртланов, Ғ. Яҡупов, артистка Л. Әхтамова, М. Вәхитова иптәштәр ҡатнашалар.

Алишер Навои

Тыуған илебеҙҙең бөтә халыҡтары бөйөк үзбәк шағиры Алишер Навоиҙың данлы юбилейен — 500 йыллығын билдәләйҙәр.

Алишер Навои донъя культураһы хазинаһын ғәжәп ҙур художество ҡиммәтле һәм философик ҡоласлы художестволы әҫәрҙәр менән байытҡан художестволы һүҙ һәм фекер корифейҙәре сафына инә.

Үҙ халҡының ижад даһилеген сағылдырған — Пушкин, Шевченко, Шота Руставели, Абай исемдәре менән бер рәттән, Алишер Навоиҙың да исеме бөтә совет кешеләренә яҡын һәм хөрмәтле.

Навои XV быуаттың икенсе яртыһында, Аҡһаҡ Тимурҙың һуңғы тоҡомдары идара иткән осорҙа йәшәне һәм ижад итте. Был осор Урта Азия хөкүмәттәренең политик һәм социаль тормошонда тәрән ҡаршылыҡтар менән характерле. Ҡыҫҡа ғына тыныслыҡ ваҡыттары дәһшәтле ҡәбилә-ара һуғыштар, тәхет даулаусы күп һанлы кешеләрҙең ҡанлы көрәштәре, феодалдарҙың әлҡым сәйәсәттәре менән алмашындылар.

Шағир-гуманист, үҙ дәүеренең алдынғы фекерҙәрен ҡыйыу әйтеүсе, кешене ҡайнар һөйөү менән илһамланған Алишер Навоиҙың ҡеүәтле тауышы ошо дәүерҙә былай яңғыраны:

«Тик шул хаҡлы «кеше»
тигән ҙур атҡа,
Кем һәр ваҡыт хеҙмәт итә
халҡҡа!».

Алишер Навои Герат ҡалаһында, ҙур чиновник семьяһында тыуа. Ул йәштән үк белем алыу һәм шиғыр менән ҡыҙыҡһына башлай. Мәктәптә саҡта уҡ фарс һәм төрөк шағирҙәренең меңәр юл шиғырҙарын ятҡа белә.

Алишер үҙ заманының атаҡлы ғалимдәрендә уҡый. Уның ҡыҙыҡһынған нәмәләре әйләнәһе бик киң була; философия, медицина, дини уҡыуҙар һәм ярҙамсы фәндәр менән шөғөлләнә ул. Ләкин даими һәм үҙгәрмәҫ мөхәббәте шиғырҙа була.

Үзбәк әҙәбиәтендә һәм телендә Навои бик ҙур роль уйнаны. Был өлкәлә ул яңы дәүер асты һәм көнсығыш халыҡтарының әҙәбиәтенә уның йоғонтоһо күп быуаттар буйына һиҙелде.

Ул замандарҙа Урта Азияла государство, общественность араһында һәм әҙәбиәттә, халыҡҡа ят фарсы теле, берҙән-бер шиғри тел, тип иҫәпләнә. Халыҡтың телен, культураһын һәм мәғарифен күтәреүҙе Навои иң мөһим бурыс итеп һанай. Ул туҡтауһыҙ рәүештә үҙ замандаш шағирҙәрен тыуған телдә яҙырға өндәй һәм, «Ике тел бәхәсе» (фарс һәм үзбәк телдәре) тигән гүзәл лингвистик хеҙмәт тыуҙырып, үзбәк теленең бай һәм гүзәл булыуын күрһәтте.

Навои һәр халыҡтың үҙ теле, үҙ искусствоһы, үҙ культураһы булырға тейешлеген яҡшы аңлай һәм уны государствоны ҡығытыуҙың мөһим факторы тип иҫәпләй.

Үҙ ғәзәлдәрен һәм күп формалағы шиғырҙарын Навои, «Чардиван» («Дүрт йыйынтыҡ») исеме аҫтында билдәле булған, ҡырҡ ете мең юлдан торған бер китапҡа туплай. «Чар-диванды» ысындан да шиғыр диңгеҙе тип атарға мөмкин.

Ваҡыттар үтеү менән шағир үҙ алдына тағы ла юғарыраҡ маҡсаттар ҡуя. Ул «Хәмсә» — биш поэма тыуҙырыу тураһында уйлай.

Навоиҙың «Хәмсәһенә»: «Игеләрҙең таң ҡалыуы», «Ләйлә һәм Мәжнүн», «Фарһад һәм Ширин», «Ете йондоҙ», «Искәндәр стенаһы» поэмалары тупланалар. Был поэмаларҙа ул кешелек аҡылына, гүзәллегенә, ижади хеҙмәткә гимн йырлай.

Навоиҙың ҡатын-ҡыҙ образлары — Ширин һәм Ләйлә йөкләндереп тыстар. Улар тәрән рухани гүзәллек ысын батырлыҡ, тоғролоҡ һәм мөхәббәттә үҙ-үҙҙәрен ҡорбан итеүгә тиклем етерлек сифаттар менән тулы. Улар — талантлы, белемдәрен төрлө яҡтан үҫтергән ҡатындар һәм урта быуат бығауҙарын өҙөп ташларға ынтылыусылар.

Государство деятеле булараҡ Навоиҙың үҙенсәлеге шунда, бөйөк шағир, министр сифатында, барынан элек халыҡ файҙаһын яҡлай. Әҙәби, культура һәм общественный тормоштағы, Хөсәен Байҡара солтан менән бәрелештәге, реакционерҙар менән көрәштәге Навоиҙың эшмәкәрлегенең үҙәгендә — халыҡҡа мөхәббәт ята. Халыҡтың яҡшы көн-күреше өсөн бындай даими хәстәрлеге, үҙ әҫәрҙәрендә ватан һәм государство яҙмышына бәйләнгән проблемаларҙы ҡуйыу, уларҙы хәл итергә тырышыуҙы Навоиға тиклем булған бер генә үзбәк шағирендә лә беҙ күрмәйбеҙ.

Алишер Навоиҙың донъяға ҡарашында көслө һәм прогрессив яҡтар булыу менән бергә, шул дәүерҙең социаль ҡаршылыҡтары нигеҙендә килеп тыуған йомшаҡ яҡтар ҙа бар. Уның философик ҡараштары дини-мистик элементтәрҙән дә азат түгел. Уның әҫәрҙәрендә күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән, «донъя тормошоноң ауырлығы», донъя мәшәҡәттәре һәм башҡалар тураһында уйланған урындар ҙа бар. Былар бөтәһе лә шул саҡтың тормош шарттарына, шағир хыялының ҡаты ысынбарлыҡтан айырылыуына бәйләнгәндәр.

* *

Алишер Навоиҙан беҙҙе биш быуат айыра. Совет халҡына уның ҡеүәтле шиғри даһилеге яҡын һәм ҡәҙерле. Навоиҙың ижадындағы бөтә яҡшы, алдынғы, прогрессив ҡараштар — тыуған илгә һәм үҙ халҡына мөхәббәт, белем һәм хеҙмәт алдында баш эйеү, дуҫлыҡ һәм мөхәббәткә саҡырыу һәм, аҙаҡ килеп, кешелектең яҡты киләсәгенә, аҡыл һәм гүзәллектең тантанаһына ышаныу тойғолары яҡын һәм ҡиммәт.

М. Айбек,
Сталин премияһы лауреаты.

Фарһадтың тыуыуы

(«Фарһад һәм Ширин» поэмаһынан глава. Ҡыҫҡартылып алынды).

Рәссам был ебәк ҡытай еленен
Биҙәкләгән һөйөп һәр бер биҙәген:
Матурлыҡта тиң юҡ Ҡытай иленә,
Көнләшә унан гүзәл бағ гөлө лә.
Был илдең шаһы — олоғ бер хан булған,
Хан тимә, о, ул олоғ хаҡан[1]) булған.
Ике донъя — ерҙәренең киңлеге,
Ете күктәй тәхтенең бейеклеге,
Ғәскәрҙәре күп ерҙәге ҡомдан да
Нәмә ҡом, күп күктәге йондоҙҙарҙан да.
Бындай байлыҡ күрмәгән Афридун[2]) да,
Мең тапҡыр ярлы булғандыр ҡарун да.
Уның алдында ҡол монгол хандары,
Бирәләр уға ерен һәм малдарын.
Руднигтан дә бай ул ҡиммәтле ташҡа,
Йомарт ҡулдан йәүһәр аға һәр яҡҡа.
Рудник тимә, әйт, ул барынан артыҡ,
Бер ни юҡ унан артыҡ, унан артыҡ.
Яҙмыш уны күктәрҙән аҡ яратҡан.
Бар хандарҙан тик уны таҡ яратҡан,
Донъя шул тиклем яғыҙ иткән уны,
Булмаған бит исмаһам тиң бер улы.
Әйтә ине: «Даими түгел донъя,
Нык түгел нигеҙ уның һарайында,
Мәңгелектең һарайы бөйөк түгел,
Бәләләрҙән был донъя ирек түгел,
Торһа әгәр кеше мең йыл шаһ булып,
Бар донъяның байлығына баш булып,
Ниһайәт, ул әсәс тә үлем һыйын,
Аңлар донъяның ошолай булыуын.
Күккә тейгән бөйөк тәхет шаһы ла,
Кейеҙ йортта ғүмер иткән ярлы ла.
Бар тупраҡтан китер саҡта һелкеп еҫ,
Икеһе лә тиң улар, һис шикһеҙ, тиң.
Нинә күккә күтәрһен тажлы башын,
Булмаһа уға унан эйәс ташы.
Бала — эйәһе, ата уға ҡабырсыҡ.
Унаң өҫтән ниндәй бәхет табырһың.
Булмаһа әгәр ҡабырсыҡ һәм эйәс
Буш, сырайһыҙ һыу тип һана диңгеҙҙе.
Йөрәгемдә шул ғазаптар тамғаһы,
Ҡурҡамын: тоҡомом һүнеп ҡалмаһын.
Күпме хәсрәт, нисә йылдар йотоп ҡан,
Булдым был Ҡытай илендә мин хаҡан,
Ҡалдырып китһәм донъяның бар эшен,
Килер һәм алыр урынымды ят кеше.
Аяҡ ҡуйыр түшәк һәм мендәремә,
Ғәскәрен һибер бөтә йорт-еремә,
Ҡул һалыр ул илемә, бар мөлкемә,
Хазинамды туҙҙырыр ел иркенә.
Улһыҙлыҡтан миндәге был ҡайғылар,
Был ғазаптан, тәңре, ҡасан айырылам.
Тот ҡулымдан, был упҡындан арала
Ас күҙемде, бир миңә тик бер бала».
Хандың бөтә һөйләгәне шул ине,
Һәм хоҙайҙан телүгәне ул ине.
Аҡты күҙ йәше оҡшап саф эйәгә,
Ул һорағаны эйәләй йәш бер генә.
Һипте аҡса ирешер өсөн маҡсатҡа,
Әйтте вәғәҙә, өләште күп садаҡа,
Бәхет бирел күңелен тапты улһыҙҙын,
Йәтимдәргә ата булып ҡул һуҙҙы.
Былар бары ла ҙур теләктең нәрсәһы,
Ул теләк — булыу бер бала атаһы.
Белмәне вәғәнды яҙмыш ҡәләмә
Үҙгәртергә юҡ һис кемдең һмәйе.
Барһа кеше файҙалы бер маҡсатҡа,
Яҡшылыҡ күрер бер уны тапмаҡта.
Шулай зарланып янды хан йөрәге,
Тәңрегә етте, ниһайәт, теләге.
Шәбистанда[3]) тыуҙы яңы нурлы ай,
Яңы ай түгел, ҡояш балҡый шулай.
Баҡсаһында асылды бер утлы гөл,
О, ҡайғы хәсрәт нуры ул, гөл түгел.
Йөҙөк бирҙе яҙмыш уның ҡулына,
Биҙәп ҡашын утлы яҡут нурына.
Йөҙөнә ғишыҡ серҙәре ҡуйолған,
Эсенә ҡайғы һүҙҙәре уйылған.
Түгел эйәс, түгел йөҙөк, яҡут ҡаш,
Ул донъяны яндырыусы аҫыл таш,
Ишелгән ебе тоғролоҡ нурынан.
Тишелгән бағре яҙмыштың ҡулынан.
Күҙендә — ташҡан йәшенең эҙҙәре,
Тынында аһ тетәнәнең хәбәре.
Мөхәббәт нуры уйнай ияғында,
Тоғролоҡтоң тамғаһы маңлайында.
Мөхәббәт халҡында үҫте сыуалыш,
Ут эсенән үткән кеүек Сиявуш[4]).
Тоғроларҙың араһында шау ҙа-шыу,
Китте шатлыҡтан бер-берен ҡотлашыу.
Был эйәгә ҡарап, ата әйелде,
Иренләре ҡабырсыҡтай йәйелде.
Хан шул тиклем йәүһәр састе йыһанға,
Хатта рудник һәм диңгеҙ ҡалды таңға.
Биҙәлде бар ер, бөтә Ҡытай иле,
Уҡла мең төрлө нәфис биҙәк ине.
Халыҡҡа аңлатты хан шундай ҡарар:
Ҡытай илендә булһа күпме дивар
Яһалһын барыһы гүзәл биҙәк менән;
Уратылһын ҡиммәтле ебәк менән.
Ул ебәктәр шундай оҫта сигелгән,
Гүйә унда эйәс, гәүһәр һибелгән.
Ҡытай тиңһеҙ байлыҡ менән маҡтана,
Һәр күңел үҙ яҙмышынан шатлана.
Халыҡ нәмә ҡылһа ла тиргәгән юҡ,
Ни ҡылмаһын, яман ҡылдың тигән юҡ.
Шундай бер ҙур мәжлес йыйылды бында,
Күк йәҙә һәм иҫкенән ҡалған донъя
Күрмәгән бындай кеүек байрам кәнен,
Аңлатып булмаҫ уның йәҙҙән берен.
Күктәрҙән дә киң ашъяулыҡ табында,
Ҡояштай ҙур, түңәрәк нан алдында.
Йорт-иленән мохтажлыҡты алды хан.
Ҡотҡарып, илде ес йыллыҡ һалымдан.
Уйнай, көлә, ишләргә белмәй халыҡ,
Тормай исмаһам бер минут тын алып.
Шатлыҡ менән шаулай илдең һәр яғы,
Китте тейәнеп ҡайғы-зар караүаны.
Ил өҫтөнән талаусы ҡул юғалды.
Уның урынын даими бәхет алды,
Ҡалһа ҡалыр йыйырсыҡ тик далала,
Ҡыуаныс ауа уға ла ҡалана.
Ҡыҙыл шәрбәт ҡайғыңы йыуып аҡты,
Ҡара хәсрәт шунда сыҡмаҫҡа батты.
Сынлатып яҡты көсәнән йәнле өн
Бир миңә лә, аяҡсы, туй әләмен,
Тулыраҡ һал көсәне, исерт мине.
Байрамында ҡунаҡ мин, Ҡытай иле.

Мостай Кәрим тәржемәһе.

[1]) Хаҡан — император.

[2]) Афридун — көнсығыш эпосының геройы. Фирдәүсиҙең Шаһнамәһендә иҫкә алына.

[3]) Шәбистан — йоҡо бүлмәһе.

[4]) Сиявуш—Иран әкиәттәрендә ут эсендә тыуған герой.

Тәнҡит һәм библиография

„Беҙҙең быуын"

(Ғ. Рамазанов шиғырҙары. Башгосиздат баҫмаһы).

Ғ. Рамазановтың тәүге шиғырҙары бынан 9—10 йылдар элек «Йәш төҙөүсе», «Ленинсе» газеталарында һәм «Пионер» журналында баҫылып килделәр. Ул шиғырҙар бәхетле йәшлекте йырлауҙа арналғайнылар. Быйыл Башгосиздат ошо йәш шағирҙең «Беҙҙең быуын» исеме менән тәүге йыйынтығын баҫып сығарҙы. Был китапҡа авторҙың Бөйөк Ватан һуғышы осорында һәм унан һуңғы йылдарҙа яҙылған шиғырҙары индерелгәндәр.

Һәр кемгә билдәле, беҙҙең совет быуыны — геройҙар быуыны. Шуның өсөн уҡыусылар был китаптан, закунлы рәүештә, Александр Матросов, Олег Кошевой, Зоя Космодемьянская, Лиза Чайкина, Ульяна Громова һәм башҡа күп геройҙарға оҡшаш образдарҙы, шуларға хас тойғоларҙы эҙләйәсәктәр. Китаптың тәүге битендә урын алған «Бағышлау» тигән шиғырында Ғ. Рамазанов үҙе лә:

— «Яңғыраһын, әйҙә, һәр бер
һүҙҙә
Тойғолары беҙҙең быуындың,
Йәштәштәрем, бүләк булһын
һеҙгә
Тәүге талпыныуы йырымдың»

тип, алдына ҡуйған бурысын бик дөрөҫ һәм асыҡ итеп билдәләй. Дөрөҫөн әйтергә кәрәк, йәш шағир ҡайһы бер шиғырҙарында, еңеүсе һалдат булараҡ, үҙ быуынының тойғоларын бик матур һәм дөрөҫ сағылдыра алған. Әлеккә студент, тыуған ауылына ҡайтҡан еңеүсе-һалдат үҙенең әсәһенә былай ти:

— «Хәтерендәләр, минең яҙ-
ған яҙыу
Килмәй ҡалды дәфтәр би-
тендә?
Таптым уны, ашҡынам мин
тағы
Шул юлдарҙы дауам итергә».

Китапҡа индерелгән «Таныш тауыш», «Һалдат мундиры», «Йөрәк илауы», «Тауышым уға минең» тигән шиғырҙар матурҙар һәм йылы тойғоголар. Шулар менән йәнәшә үк ашығысыраҡ эшләнгән, күп ҡабатланған юлдар ҙа китапта бик йыш осрай. Фашизмға ҡаршы көрәштең ниндәй ҡаты һәм ауыр булғанлығын бөтә тәрәнлегендә асырға тырышаһы урында, автор уны:

«Күп үттем, дуҫтар, был ерҙең
Ҡулдарен, йылғаларын,
Минең менән барғас илем,
Батманым, юғалманым!»

кеүек, бик еңел әйтелгән, дөйөм юлдар менән генә сикләй.

Китапта мөхәббәт лирикаһына жырыуса ҙур урын бирелгән. Ләкин был шиғырҙарҙа беҙҙең йәш быуындың көслө, еңеүгә рухландырыусы мөхәббәте дөйөмләштерелеп бирелмәйҙәр. Автор уларҙа тик үҙенең кисерештәрен генә йырлай. Былай лириканы тар мәғәнәлә аңлау, кәрәкһеҙ сәсәлеккә генә килтерә.

Иптәш Рамазановтың тел һәм шиғыр техникаһы өҫтөндә аҙ эшләүе күҙгә бәрелә әле.

Йыйынтыҡта, ашығыс эшләү һөҙөмтәһендә, хата мәғәнә бирә торған юлдар ҙа йыш ҡына осрайҙар:

— «Түрҙән уҙ, йәй,
Һуғыш бөттө ииде,
Ҡынға һалдым хәнйәр-бысағын,
Ҡайтырбыҙ беҙ мөхәббәтем менән
Көтә йөйеп иркен ҡосағын»
(«Йәйгә сәләм»).

йәки:

— «Кисә генә ҡайтҡан кеүек инем,
Бик тиҙ үтте ҡыштың һалҡыны,
Һыҫҡындерен, оҫҡа тамды бөгөн
Эйәс тамсы булып ҡар һыуы!»
(«Һыҫтылыу»).

Хәнйәр-бысаҡ совет һалдатына хас һуғыш ҡоралы түгел бит ул. Икенсе строфаны бөтөнләй аңлап булмай: «Ҡыш һалҡыны үтеп китә», шағирҙең елкәһенә «һыҫҡындереп ҡар тамсыһы тама»...

Билдәле, автор — йәш шағир, ләкин, йәшлеккә ҡарап, скидка яһарға ярамай. Ғ. Рамазанов иптәш байтаҡ әҙерлекле, ҙур һуғыш юлы үткән, шулай уҡ, байтаҡ әҙәби тәжрибә туплаған шағир. Уға үҙенә ҡарата талапсаныраҡ булыу кәрәк.

Мәҡсут Сөндөклө.

Уоллестең иптәш И. В. Сталинғә яҙған асыҡ хаты

НЬЮ-ЙОРК, 11 май. (ТАСС). Ҡушма Штаттар президентлегенә өсөнсө партиянан кандидат Уоллес матбуғатта иғлан итеү өсөн «Премьер Сталинға асыҡ хат» тапшырҙы.

«Посол Смиттең, Сит ил Эштәре Министре Молотовтың ноталары икеһе лә, халыҡ-ара кризиска килтергән үҙ дәрәжәлектәрендә ҙур ышаныслыҡ менән характерләнһәләр ҙә, шулай ҙа улар даими тыныслыҡ мөмкин тип иҫәпләүселәр өсөн ҙур ышаныс булып торалар һәм был ике ил бер донъяла тыныс йәшәй алмайҙар, тип ныҡышмалы рәүештә талап итеүсе ике илдең дә пропагандистарына ауыр удар яһайҙар. Ике хат та, беҙҙең күптән уҡ иңде, ике бөйөк держава араһында һуғыш ваҡытындағы хеҙмәттәшлек тыныс ваҡытта аяҡҡа баҫтырыла һәм нығый ала, тип раҫлағанлығыбыҙ тураһында һөйләй. Һөйләшеүҙәр өсөн ишек асыусы ноталар алышыу менән бергә Ҡушма Штаттар һәм Советтәр Союзы вәкилдәренең асыҡ һәм бөтә донъяға белдерелгән кәңәшмәһе булырға тейеш. Бындай кәңәшмәнең буласағын алдан күреп, мин тыныслыҡ быуатына өлгәшеү өсөн кәрәк булған сараларға ҡарата үҙемдең фекерҙәремде әйтеп бирәм.

Ҡушма Штаттар һәм Советтәр Союзы һыуыҡ һуғышҡа сик ҡуйыр өсөн, һис кисекмәҫтән, саралар күрергә тейештәр. Был саралар иҫәбенә түбәндәге маҡсаттарға өлгәшеү өсөн йүнәлтелгән билдәле һәм ҡырҡа хәрәкәттәр ина:

1. Ҡоралланыуҙы дөйөм ҡыҫҡартыу, шулай уҡ кешеләрҙе массовый рәүештә ҡырыу өсөн билдәләнгән бөтә средстволарҙы закондан тыш тип иғлан итеү.

2. Теләһә ҡайһы илдең теләһә ниндәй башҡа илгә һәр төрлө ҡоралдар сығарыуын туҡтатыу.

3. Ике ил араһында сикләнмәгән сауҙаны (хәрби материалдарҙан башҡа) аяҡҡа баҫтырыу.

4. Ике ил араһында һәм был илдәрҙә граждандарҙың, фән вәкилдәренең, газеталар хәбәрселәренең иркле рәүештә йөрөүен тәьмин итеү.

5. Ике ил араһында фәнни информациялар һәм материалдарҙы иркле рәүештә алышыуҙы яңынан аяҡҡа баҫтырыу.

6. Тағы ла ныҡыған ЮНРРА ойошмаһын аяҡҡа баҫтырыу йәки халыҡ-ара ярҙамды бүлеп биреү өсөн Берләшкән милләттәр ойошмаһының ниндәй ҙә булһа башҡа органын төҙөү.

Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла башҡа илдәрҙең эске эштәренә тығылырға тейеш түгелдәр. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы башҡа илдәрҙә үҙҙәренең хәрби базаларын тоторға тейеш түгелдәр. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы илдәрҙең граждандарына ҡоро ер ғәскәрҙәрен туплау, авиабазалар төҙөү йәки хәрби диңгеҙ демонстрациялары үткәреү юлы менән террор яһарға тейеш түгелдәр. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла башҡа илдәрҙә политик һөжүмтәләргә өлгәшеү өсөн финанс-экономик баҫым йәки йәшерен агенттар баҫымы яһарға тейеш түгелдәр. Ҡушма Штаттар булһын, шулай уҡ Советтәр Союзы ла Берләшкән милләттәр ойошмаһы Уставы рухында кешелек донъяһының политик, экономик һәм культура тормошон нығытыуҙа үҙ-ара бик ныҡ хеҙмәттәшлек итергә тейештәр. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн Ҡушма Штаттар һәм Советтәр Союзы Берләшкән милләттәр ойошмаһының ярҙамсы ойошмаларына, мәҫәлән, һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса халыҡ-ара ойошмаға, Берләшкән милләттәрҙең азыҡ-түлек һәм ауыл хужалығы мәсьәләләре буйынса ойошмаһына һәм Берләшкән милләттәрҙең мәғариф, фән һәм культура буйынса ойошмаһына инергә тейештәр.

Берләшкән милләттәр ойошмаһы рамкаларында һәм яһалған зыянға һәм экономик ихтыяждарға пропорциональ рәүештә Европаға мөмкин тиклем тиҙерәк максималь экономик ярҙам күрһәтеү Ҡушма Штаттарға ла, шулай уҡ Советтәр Союзына ла файҙалы булып тора. Европа хеҙмәттәшлегә администрацияһы, Берләшкән милләттәр ойошмаһы һәм Европа өсөн экономик комиссия Көнсығыш һәм Көнбайыш Европа араһындағы сауҙа һәм культура бәйләнештәре өлкәһендә бер ниндәй ҙә кәртәләр булмаясаҡ һәм юғары хеҙмәт етештереүсәнлеккә хужалығы булған экономик яҡтан берләшкән Европаны төҙөү маҡсатында нығытылған һәм киңәйтелгән ЮНРРА-ға мөмкин тиклем тиҙерәк әйләндерелергә тейештәр.

Советтәр Союзы, Ҡушма Штаттар, Англия һәм Франция мөмкин тиклем тиҙерәк Германия менән ярашыу договоры төҙөргә тейештәр. Маҡсат тыныслыҡ һөйөүсе Германия хөкүмәтен йылдам рәүештә аяҡҡа баҫтырыуҙан тора. Был хөкүмәт Потсдам һәм Ялта килешеүҙәрен аныҡ һәм мәжбүри үтәргә бурыслы булып, берләшкән Германия менән етәкселек итергә тейеш. Рус, Франция, Англия һәм Америка ғәскәрҙәре Германия менән ярашыу договорына ҡул ҡуйылғандан һуң бер йыл эсендә Германиянан сығарылырға тейештәр.

Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла Ҡытайға ҡорал ебәрергә тейеш түгелдәр. Ҡушма Штаттар һәм Советтәр Союзы Ҡытайҙан да һәм Кореянан да үҙ ғәскәрҙәрен сығарырға тейештәр. Мөмкин тиклем ҡыҫҡа срок эсендә бөтә Корея өсөн хөкүмәт төҙөлөргә тейеш. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла Ҡытайҙың суверенитетен хөрмәт итеп һәм уның эске эштәренә тығылмайынса, Ҡытайҙағы бөтә илдәрҙең тигеҙ хоҡуҡлығы принциптарен еренә еткерергә тейештәр. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла экономик һәм политик демократияға таяныусы көслө һәм берләшкән Ҡытайҙан файҙа ала аласаҡтар.

Әлегә тиклем төҙөлгән килешеүҙәргә нигеҙләнгән Япония менән ярашыу договорына мөмкин тиклем тиҙерәк ҡул ҡуйылырға тейеш. Ҡушма Штаттар ҙа, Советтәр Союзы ла тыныслыҡ һөйөүсе демократик Японияны аяҡҡа баҫтырыу менән ныҡ ҡыҙыҡһыналар. Японияла оккупацион ғәскәрҙәре булған бөтә илдәр, Япония менән ярашыу договорына ҡул ҡуйылғандан һуң, бер йыл эсендә үҙҙәренең ғәскәрҙәрен сығарырға тейештәр.

Вето хоҡуҡының кәрәгенән артыҡ файҙаланылыуы һәм атом энергияһы өҫтөнән контроль тураһында алып барылған һөйләшеүҙәрҙең ҡайһы бер стадияларында килеп тыуған тупик ике ил араһында ышаныстың юҡ икәнлеген күрһәтәләр. Әгәр ҙә төп проблемаларҙа ышаныусанлыҡҡа өлгәшелһә, был ике мәсьәлә лә конструктив рәүештә хәл ителә аласаҡ. Тыныс ваҡытта атом энергияһының кешелек донъяһына яһауы ихтимал булған айырыуса ҙур файҙалар өсөн ишектәрҙе ашығыс рәүештә асырға кәрәк. Атом энергияһын һуғыш маҡсаттарында файҙаланыу енәйәт һәм хәһәрле эш булып тора. Тыныс тормош өсөн атом энергияһын ҡулланыу фән өсөн бөйөк эш буласаҡ.

Атлантик хартия донъяның бөтә милләттәре өсөн иркле рәүештә сырьё алыуҙы күҙҙә тота. Был бәләкәй илдәр өсөн бик мөһим һәм Ҡушма Штаттар ҙа, шулай уҡ Советтәр Союзы ла Атлантик хартияның 4-се статьяһын тормошҡа ашырырға тейештәр.

Ҡушма Штаттар һәм Советтәр Союзы араһында һуғышҡа тиклемгегә ҡарағанда тауар алмашыуҙы күп тапҡырҙар арттырырға мөмкинлектәр бар. Сауҙаны һәр төрлө дискриминациянан ҡотолдороп, уны шул рәүештә арттырыу ике ил араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә ярҙам итәсәк, һәм, тимәк, дөйөм тыныслыҡ эшен нығытасаҡ.

Ҡушма Штаттарҙың миллионлаған граждандары, бөтә донъяны үҙҙәренә буйһондороу совет етәкселәренең үҙ алдарына ҡуйған маҡсаттары, тип иҫәпләйҙәр. Советтәр Союзының миллионлаған граждандары, Советтәр Союзына бәреп инеү Ҡушма Штаттарҙың үҙ алдарына ҡуйған маҡсаты булып тора, тип иҫәпләйҙәр. Төгеләре лә һәм былары ла үҙ ҡараш нөктәләрен тағы ла ышаныслыраҡ итеп күрһәтеү өсөн айырым вәҡиғаларға күрһәтәләр. Һәр бер ил, теләһә ниндәй башҡа илдең территориаль бөтөнлөгөнә ҡул һуҙмауы тураһында туранан-тура һәм ҡәтғи рәүештә белдерергә тейеш.

Коммунизм менән капитализм араһындағы идеологик ярыштың Советтәр Союзы менән Ҡушма Штаттар араһындағы үҙ-ара аңлашыу булмау менән уртаҡ бер нәмәһе лә юҡ. Һуңғы проблема тыныслыҡты яҡлау өсөн хәл ителә ала. Ләкин коммунистик һәм капиталистик системалар араһындағы ярыш бер ҡасан да бөтмәйәсәк. Был ярыштың конструктив булып ҡалыуы, һәм уның бер ваҡытта ла 17 быуат башында Европаны бөлгөнлөккә төшөрөүсе утыҙ йыллыҡ дини һуғыш кеүек һуғышҡа килтермәүе менән ике ил дә ҡыҙыҡһына. Ҡушма Штаттар үҙенең граждандары булмаған йәки үҙенең номиналь граждандары ғына булған күп капиталистәре ҡалған халыҡтарҙы изгәне өсөн яуаплы булмаған кеүек уҡ, Советтәр Союзы ла уҫындағы коммунистәрҙең ҡылыҡтары өсөн яуаплы түгел.

Һис шикһеҙ, күп кенә коммунистәр һәм капиталистәр үҙ системаларының донъяла ҡотолғоһоҙ хакимлек итәсәгенә ышаныс белдерәләр. Ләкин был, Советтәр Союзы һәм Ҡушма Штаттар даими конфликтта торорға тейештәр, тигән һүҙ түгел. Аҡрынлап үҫеш процесе ике экономик системаның көслө һәм көсһеҙ яҡтарын билдәләгән бер ваҡытта, ике ил дә үҙ-ара килешә алалар. Шул уҡ ваҡытта бөтә донъяның азат халыҡтары, үҙҙәренең тәжрибәләре нигеҙенә таянып, теге йәки башҡа илдәр өсөн иң яҡшы итеп ҡулайлаштырылған системаларҙы көн һайын яҡшыраҡ баһалаясаҡтар.

Ҡушма Штаттар менән Советтәр Союзы араһында көс йәки ҡурҡытыу ярҙамында регулировать ителә торған аңлашылмаусанлыҡтар һәм ауырлыҡтар юҡ, һәм тыныс юл менән алып барыла торған уңышлы һөйләшеүҙәр ярҙамында регулировать ителә алмай торған фекер айырымлыҡтары ла юҡ. Һыуыҡ һуғышҡа сик ҡуйыу һәм ябай кеше теләй торған тыныс быуатты башлау өсөн ҡорбан килтереү кәрәк булған Америка принцибе лә йәки общественный интерес тә юҡ, шулай уҡ рус принцибе лә һәм общественный интерес та юҡ».

Өфө парктарында һәм баҡсаларында йәйге сезон асылыуға әҙерлек бара.
Һүрәттә: Луначарский исемендәге баҡса сезон асылыу алдынан.
М. Әхмәтйәнов фотоһы.

Байрам шатлығы

Май. Сәскә айының беренсе иртәһе. Бөгөн көн шундай матур. Әйтерһең, ул бөтә туғанлыҡ үҙенә йыйған да, беренсе хат яҡтылыҡ һәм йылылыҡ өләшә. Ҡояш нурҙары, Тратауҙың күкһел ҡаяларына бәреләп, сағылалар. Тау итәгендәге үҫкән умырзаялар, күҙҙәрҙе ҡуып алып, емелдәйҙәр, шатлыҡлы май менән ҡотлайҙар кешене.

Халыҡ байрам итә. Шатлыҡ, хеҙмәт һәм дан байрамы бөгөн.

Тратауҙың көньяҡ итәгендә ултырған бер ауыл өсөн дә байраҡ елфегән. Был — пионерҙар байрағы. Байраҡ әленгән ерҙәге майҙан Ленин, Сталин портреттәре, плакаттар, лозунгылар менән биҙәлгән. Бында май һәм исем алыу тантанаһы үтәсәк. Майҙанға 21-се дружина пионерҙары йыйналдылар. Улар үҙҙәре сәскә кеүек, майҙанды сыбарлап, тигеҙ сафта торалар, һәр кем күҙендә шатлыҡ осҡондары уйнай...

Дружинаға Советтар Союзы Геройы Александр Матросов исеме бирелә. ВЛКСМ-дың Маҡар район комитеты секретаре иптәш Рахимов, исем бирелеү тураһындағы ҡарарҙы уҡығас, пионерҙарға геройҙың портретын тапшыра. Әйтерһең, Саша Матросов дружинаға үҙе килде. Балалар, уның портретен хөрмәт менән алып, [illegible] сәскәләр(?) [illegible]. Ант [illegible]

— Матросов кеүек булабыҙ. [illegible] Ватаны һәйбә [illegible]!

Ватан!

Бөйөк Ватан беҙҙе [illegible] не. Бөйөк Сталин беҙҙе [illegible] на алды. Халыҡ беҙҙе [illegible] Ватан хөрмәтен [illegible] Матросов кеүек булырбыҙ.

Әйе, Урманбишҡараҡ балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр [illegible] лек беләмбеҙ. Уларға [illegible] кәрәкле бөтә шарттар [illegible] гән. Балалар тәрбиә ала, [illegible] әйрәнәләр. Балалар йорт[illegible] әргәһендә столярный, [illegible] кейемдәре тегеү мастерской[illegible] ИЗО һәм башҡа түңәрәктәр бар.

Байрам тантанаһынан һуң, [illegible] моделистар ярышы үтте. Ярыш[illegible] Асанов, Ғәйнуллиндарҙың [illegible] беренселеккә алдылар. Улар [illegible] авиамоделдәре 20—25 минут ос[illegible]

Балалар йортонда тәрбиәләнеүселәр 1 Май тантанаһын бына шулай үткәрҙеләр. [illegible] ла — [illegible] пионер отличнигы, 30 пионер яҡшы билдәләренә генә уҡыйҙар.

З. Ямалетдинов.

Донъя шахмат чемпионаты

Союздар йортоноң Колонналар залында 13 майҙа донъя беренселеге өсөн шахмат матч-турниренең 24-се туры уйналды. Был турҙа Ботвинник менән Решевский, Эйве менән Смыслов осраштылар. Был ике партия бик ҡыҙыу көрәш менән үтте. Сөнки уларҙың һөҙөмтәһендә кемдең икенсе урынды алыуы билдәләнә ине. Был урын өсөн Смыслов, Решевский, Керес көрәшәләр ине.

Ботвинник АҠШ чемпионын бирелергә мәжбүр итте. Ботвинник бөтә уйынын [illegible] алып барҙы. Шулай итеп, Ботвинник—Решевский осрашыуҙары — 3,5:1,5 һөҙөмтәһе менән, совет гроссмейстеренең файҙаһына бөттө.

Эйве — Смыслов партияһы, 39 йөрештән һуң, Смыслов файҙаһына [illegible] тамамланды.

Смыслов беренсе [illegible] турнирҙе тамамлап, 11 очко йыйып, [illegible] һәм үҙенә икенсе урынды тәьмин итте.

24 турҙан һуң матч-турнир ҡатнашыусыларҙың хәле шулай: Ботвинник — 19 мөмкинлектән 14, Смысловтың 20 мөмкинлектән —11, Керес менән Решевскийҙың —9,5, Эйвенең — 4 очкоһы бар. 16 майҙа һуңғы 25-се тур уйнала. Был турҙа: Керес менән Ботвинник, Решевский менән Эйве осрашасаҡтар. (ТАСС).

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата

Америка официаль кругтарының позицияһы

ВАШИНГТОН, 11 май. (ТАСС). В. М. Молотовтың һәм Смиттең белдереүҙәренең әһәмиәте тураһында һөйләп, Американың официаль круглары АҠШ Советтәр Союзы күтәреп сығырға теләгән теләһә ниндәй конкрет мәсьәләләрҙе тикшерергә шат, ләкин АҠШ, Молотовтың белдереүе ниндәй ҙә булһа конкрет теманы тикшереүгә ҡуя, тип иҫәпләмәйҙәр.

Ассошиэйтед пресс агентствоһының Вашингтондағы дипломатик күҙәтеүсеһе Хайтауэр, Смиттең ике ил араһындағы мөнәсәбәттәрҙе юлға һалыу өсөн ишек асыҡ килеш ҡала, тип тәү башта яһаған күрһәтеүенең Аҡ йорт белдереүендә лә, государство департаментенең 11 майҙа яһаған белдереүендә лә айырыуса күрһәтелмәгәнлеге әһәмиәтле факт булып тора, күрәһең, тип белдерҙе. Ике белдереү ҙә, Смит, башлыса, АҠШ позицияһына аныҡлыҡ индерергә тырышты, тип айырыуса билдәләй. Хайтауэр, «Американың официаль круглары рустарҙың Америка позицияһын көсһеҙлек билдәһе итеп аңлатыуҙарына юл ҡуйырға теләмәйҙәр күрәһең, тип яҙа. Государство департаменте эксперттәре, рустар ғәҙәттә, килешеүҙе көсһеҙлек билдәһе итеп аңлаталар, тип иҫәпләп, тәҡдимдәр яһамайҙар. Официаль круглар, ҡайһы бер совет официаль вәкилдәренең, ахырыһы, АҠШ-тың был хәрәкәтен көсһеҙлек тип иҫәпләйҙәр икәнлегенә ҡайһы бер фекерҙәр бар, тип хәбәр иттеләр. Официаль круглар вәкилдәре Берлиндан алынған хәбәрҙәрҙе белдерҙеләр. Бында, АҠШ-тың Советтәр Союзына яҙған нотаһы АҠШ-тың һыуыҡ һуғыш алып барыуҙан арығанлығын аңлата, тип әйтелә. Вашингтондағы властар, әгәр ҙә рустар ошондай фекерҙән сығып хәрәкәт итергә тырышһалар, мөнәсәбәттәрҙе тәртипкә һалыу перспективалары бик аҙ буласаҡ, тип белдерҙеләр. Әгәр ҙә Советтәр Союзында, Европаны аяҡҡа баҫтырыуҙы, Германия менән ярашыуҙы, Австрияның, Кореяның бойондороҡһоҙлоғон, Көнсығыш Европа илдәренең азатлығын һәм шуға оҡшашлы проблемаларҙы ла индереп, проблемаларҙың бөтә кругтарына ҡағылышлы ниндәй ҙә булһа конкрет идеялар бар икән, ул саҡта һөйләшеүҙәр өсөн нигеҙ табыласаҡ».

Шунан ары Хайтауэр, «официаль вәкилдәр Вашингтон менән Мәскәү араһында артабан ноталар алышыу буласағына ышанғанлыҡтарын белдерҙеләр. Был айҡанлы һәр бер яҡтың артабан аҙым яһай аласағы асыҡ», тине.

Хайтауэрҙың һүҙҙәренә ҡарағанда, «Советтәр Союзы менән АҠШ араһында ноталар алышыу айҡанлы, хөкүмәт башында тороусы кешеләрҙең бер шартты: әлегә тиклем АҠШ-тың һәм Советтәр Союзының да төп политиканың бер генә мөһим пункты буйынса ла үҙгәртеү, ҡабаттан ҡарау йәки килешеүгә өлгәшеү яғына бер генә лә аҙым яһамағанлыҡтарын айырыуса билдәләнеләр. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, кәңәшмә өсөн әлегә бер ниндәй ҙә реаль нигеҙ юҡ әле».

НЬЮ-ЙОРК, 11 май. (ТАСС). Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәреһенең Мәскәүҙән хәбәр итеүенә ҡарағанда, Американың Мәскәүҙәге посольствоһы вәкиле (уның исеме күрһәтелмәй) Молотов менән посол Смит араһында ноталар алышыу ваҡытында Ҡушма Штаттар, имеш, Америка-Совет мөнәсәбәттәрен ике яҡлап тикшерергә тәҡдим итмәне, тип белдергән.

Смит һәм государство секретаре Маршалл араһында хаттар алышыу булғандан һуң Смит Молотовҡа Америка позицияһын раҫлау маҡсатында нота тапшырырға ҡарар итте, тип билдәләп, был вәкил былай тип белдергән: «Бында йәшәгән ҡайһы бер дөрөҫ булмаған ҡараштарҙы төҙәтергә тырышып ҡарарға һәм был мәсьәләне асыҡларға ваҡыт килеп етте, тип ҡарар ителде. Посол Смиттең Молотов менән осрашҡанда башҡаса бер ниндәй ҙә маҡсаты булманы».

СОВЕТ-АМЕРИКА МӨНӘСӘБӘТТӘРЕ ТУРАҺЫНДА ПОЛЬША МАТБУҒАТЫ

ВАРШАВА, 11 май (ТАСС). Төштән һуң сыға торған «Речь Посполита и дзенник господарки», шулай уҡ кис сыға торған «Бетур» һәм «Экспресс вечерны» газеталары беренсе биттәрҙә ҙур баштар аҫтында «Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата» тигән хәбәрҙәр баҫып сығарҙылар. Совет хөкүмәтенең АҠШ менән булған фекер айырымлыҡтарын тикшерә башларға һәм тәртипкә һалырға әҙер тороуы айырыуса билдәләнә.

ИТАЛИЯЛА ЯҢЫ ХӨКҮМӘТ ТӨҘӨЛӨҮГӘ ҠАРАТА

РИМ, 13 май. (ТАСС). Республика президенте Эйнауди 12 майҙа кис министрҙар советы председателе де Гасперини ҡабул итте. Гасперн уға үҙ хөкүмәтенең отставкаға сығыуы тураһында белдерҙе.

Официаль белдереүгә ҡарағанда, де Гаспериҙың отставкаға сығыуын Эйнауди ҡабул итеүҙән баш тартҡан. Был айҡанлы де Гаспери, яҡын киләсәк көндәрҙә үҙ кабинете составындағы ҡайһы бер үҙгәртеүҙәрҙе президент раҫлауына индерәсәге һәм шунан һуң хөкүмәт парламенттың ике палатаһы ҡарамағына ҡуйыласағы тураһында белдергән.

Эйнаудиҙың, әлех уҡ, күрәһең, де Гаспери менән килешеп, һәм дөйөм конституция нормаларын боҙоп эшләнгән ҡарары де Гаспериҙе элекке хөкүмәт коалицияһының башҡа партнерҙарына ҡарата ғәҙәттән тыш хәлдә ҡалдыра һәм уға сарагатсыларҙың һәм республикасыларҙың талаптары менән иҫәпләшмәйенсә, кабинет төҙөргә мөмкинлек бирә.

Маршаллдың белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 12 май (ТАСС). Бостон радиоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Маршалл пресс-конференцияла, үҙенең хөкүмәтенең ике хөкүмәттең дә интерестарына ҡағылышлы мәсьәләләр буйынса Совет Хөкүмәте менән ике яҡлы һөйләшеүҙәр башларға уйлағанлығы тураһында белдергән. Ул, иң мөһим халыҡ-ара мәсьәләләр буйынса теләһә ниндәй һөйләшеүҙәр был мәсьәләләр өсөн яуаплы органдарҙа үтергә тейештәр, тип айырыуса билдәләгән. Маршалл былай тигән: Беҙ мөмкин булған һәм хәҙерге ваҡытта кисектергеһеҙ кәрәк булған урында хәрәкәт итергә теләйбеҙ. Бындай хәрәкәттәр сфераһына ул Имиселек советен һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһының башҡа органдарын, шулай уҡ Берлиндәге Союзный контроль советен индергән.

Яуаплы редактор Г. В. ГУЗАИРОВ.

СТРАХОВАТЬ итергә
онотмағыҙ!
Госстрах агенттәрен өйөгөҙгә саҡырығыҙ!

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00747. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14500

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 97
16
май
йәкшәмбе

Хаҡы 20 тин

Һеҙҙе, туғаныбыҙ Иосиф Виссарионович, беҙ, Башкортостан колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәрҙәр һәм һөйөклө Тыуған илебеҙгә күберәк иген, ит, һот, йон, йәшелсәләр һәм ауыл хужалығының башка продуктыларын бирерҙәр, тип ышандырабыҙ.

(Башкортостан игенселәренән иптәш И. В. Сталингә яҙған хатынан).

Үҙ һүҙебеҙҙе намыҫ менән үтәрбеҙ

Бөгөн газетабыҙҙа республикабыҙ игенселәренең халкътарҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталингә яҙған хатын баҫабыҙ. Был беҙҙең тормошобоҙҙа бик гүзәл ваҡиға булып тора.

Башкортостаң игенселәре коммунистәр партияһының, Совет Хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндең көндәлек хәстәрлеген даими рәүештә күрәләр. Беҙҙең хөкүмәтебеҙ республикала социалистик игенселекте аякка баҫтырыу һәм уны тиҙерәк үҫтереү өсөн гайәт ҙур ярҙам итә. Тик һуңғы йылдарҙа ғына Башкортостандың МТС-тары, колхоздары һәм совхоздары бик күп һанда тракторҙар һәм башка төрлө ауыл хужалығы машиналары алдылар. Етерлек тиклем орлоҡ менән тәьмин ителделәр. Башкортостаң эшсәндәре был хәстәрлеккә яуап итеп юғары урожай өсөн көрәштә үҙҙәренең хеҙмәттәрен аямайҙар. 1947 йылда колхоз ауылы бай урожай үҫтерҙе һәм государствоға үҙгән йылдарға ҡарағанда бик күп артык иген бирҙе. Игенселәрҙең был хеҙмәттәрен Совет Хөкүмәте юғары наградалар менән билдәләне.

Республикабыҙ ауыл хужалығы работниктәре үҙҙәренең иптәш Сталингә яҙған хаттарында быйыл тағы ла ҙурырак уңыштарға өлгәшеү бурыстарын ҡуялар, бик ҙур һәм яуаплы йөкләмәләр алалар. Улар 1948 йылда бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса һәр бер гектарҙан 75-шәр бот, шул иҫәптән арыштан 80—85-әр бот, яҙғы бойҙайҙан 75—80-шәр бот урожай алырға һүҙ бирәләр. Был йөкләмәне үтәү ни тигән һүҙ? Был социалистик баҫыуҙарҙың урожайлылығын күтәреү буйынса алға табан кереш азым яңау [illegible] һүҙ. Был илебеҙҙең иген ресурстарын нык ук арттырыу, колхоздарҙың общественный милкен байытыу, колхозсыларҙың [illegible] тағы ла нығытыу, күтәреү, тигән һүҙ. [illegible]

Бер иптәш Сталин алдында бик ҙур йөкләмәләр алдыҡ. [illegible]

Был бөйөк эштең уңышы [illegible]

Ләкин бөтә районда ла, бөтә колхоз һәм совхоздарҙа ла үҙ йөкләмәләрен намыҫлы үтәйҙәрме? [illegible] Хатта Калтасы районы колхозсыларының йөкләмәләре килтерелгән. Улар сәсеү майҙанын 5,5 мең гектарға арттырырға, шул иҫәптән бойҙай сәсеү майҙанын 4,4 мең гектарға киңәйтергә, 49 мең гектар сәсеүлектән һәр бер гектарға 80-шәр бот урожай үҫтерергә һүҙ бирәләр. Ҙур һәм яуаплы бурыстар. Ләкин район колхозсылары үҙ йөкләмәләрен үтәү өсөн йомшаҡ көрәшәләр. Район колхоздарында сәсеүҙең темпы ла һәм сифаты ла түбән.

Республика буйынса ла сәсеү барышы һис ҡәнәғәтләнерлек түгел һәм ул яҙғы культуралар сәсеүҙе билдәләнгән агротехник сроктарҙа үткәреүҙе тәьмин итмәй. Быының сәбәбен сәсеү эштәренә әле колхоз ауылының бөтә көсө тупланмау, айырыуса машина-трактор паркын тулы файҙаланмау, партия һәм совет ойошмалары сәсеү эшенә оператив етәкселекте кәрәгенсә тәьмин итмәүҙәре менән генә аңлатырға мөмкин. Иртә культураларҙы, бигерәк тә бойҙайҙы яҡын ике-өс көн эсендә сәсеп бөтөрөү өсөн бөтә сараларҙы күрергә кәрәк. Төп иғтибар колхоздарҙың, совхоздарҙың бөтә көстәрен — машиналарҙы, йәнле тартыу көстәрен тулы файҙаланыуға, хеҙмәт ырамлылығын күтәреүгә, тиҙ һәм сифатлы сәсеүгә йүнәлдерелергә тейеш.

Бөгөн бөйөк юлбашсыбыҙға яҙылған хат ауылда социалистик ярыштың яңы тулкынын күтәрергә тейеш. Колхоз, бригада, звено, трактор бригадалары үҙенең йөкләмәһен, иптәш Сталингә биргән вәғәҙәһен нисек үтәй? — быны ярышта ҡатнашыусы һәр кем нәмә тураһында уйларға тейеш. Үҙ йөкләмәңде һәр ваҡыт иҫтә тотоу, [illegible]

Республиканың машина-трактор станциялары [illegible]

Иптәш Сталингә яҙған хатта республикабыҙҙың малсылыҡ работниктәре [illegible]

Совет халкының бөйөк уҡытыусыһы иптәш Сталингә яҙған беҙҙең хатыбыҙ [illegible] Үҙ һүҙебеҙгә [illegible] йөкләмәләребеҙҙе намыҫ менән үтәйек!

Республикала беренсе булып

[illegible]

Ауыл хужалығы өсөн яңы машиналар

СССР Ауыл хужалығы машиналары төҙөлөшө Министерстволарының [illegible] «Красный Аксай» заводында һәм Саранскиҙағы ауыл хужалығы машиналары заводында [illegible]

Башкорт АССР-ы колхозсыларынан һәм колхозсы катын-кыҙҙарынан, МТС һәм совхоз работниктәренән, ауыл хужалығы специалистәренән

Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ Иосиф Виссарионович СТАЛИНГӘ

Ҡәҙерле Иосиф Виссарионович!

Беҙ, орденле Башкортостандың колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре, Алтай крайы игенселәренең иәге, патриотик башлангысы өлгөһөндә ауыл хужалығын артабан тағы ла ҡеүәтлерәк күтәреү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышҡа ҡушылып, үҙ өҫтөбөҙгә 1948 йылда түбәндәге йөкләмәләрҙе алабыҙ:

1. Республика буйынса сәсеү майҙанын 488 мең гектарға, шул иҫәптән колхоздарҙа 441 мең гектарға һәм совхоздарҙа 47 мең гектарға, шуның эсенән яҙғы бойҙай майҙанын колхоздарҙа 350 мең гектарға һәм совхоздарҙа 35,5 мең гектарға киңәйтергә.

2. Бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 75 бот урожай алырға, шул иҫәптән һәр бер гектар арыштан 80—85 бот һәм яҙғы бойҙайҙан 75—80 бот урожай алырға өлгәшергә.

Баҫыусылыҡ буйынса

Республиканың төп бөртөклө ашлыҡ районлары, колхоздары, совхоздары, бригадалары һәм звенолары үҙ өҫтәренә түбәндәге йөкләмәләрҙе алдылар:

Өфө районы — яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 5,4 мең гектарға киңәйтергә.

Бөртөклө ашлыҡ культураларының 24 мең 800 гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 80-шәр бот урожай алырға. Айырым участкаларҙа 2 мең гектар арыштың һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 2300 гектар майҙанда яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 132-шәр бот урожай алырға.

Был районлың «Завет Ильича» колхозы — 70 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 180-шәр бот һәм 80 гектар майҙандағы яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Смычка» колхозы — 100 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

Ворошилов исемендәге колхозлың иптәш Макаров бригадаһы — 25 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Смычка» колхозының иптәш Анна Решетова звеноһы 13 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

Бакалы районы — яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 7,1 мең гектарға киңәйтергә. Бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә майҙанында һәр бер гектарҙан 80-шәр бот урожай алырға. Айырым участкаларҙа 11 мең гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 115-әр бот, 5 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 1 мең гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

Был районлың «Красный пахарь» колхозы — 137 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 164 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Красный Октябрь» колхозы — 83 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 125-әр бот һәм 60 гектар майҙанда яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 95-шәр бот урожай алырға.

«Красный пахарь» колхозының иптәш Горлов бригадаһы — 60 гектар майҙандағы арыштың һәр бер гектарынан 168-әр бот һәм 60 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

«Красный Октябрь» колхозының иптәш Казакова бригадаһы — 75 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 135-әр бот урожай алырға.

«Красный пахарь» колхозының иптәш Головина звеноһы—8 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот һәм 12 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

Стәрлетамаҡ районы—бөтә культураларҙың сәсеү майҙанын 12 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай майҙанын 11,1 мең гектарға киңәйтергә. Бөтә майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 80—90-шар бот урожай алыуға өлгәшергә. Айырым участкаларҙа 8 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 115-әр бот, 10 мең гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 85-әр бот урожай алырға.

Был районлың Шевченко исемендәге колхозы — 2000 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр гектарынан 100-әр бот, шул иҫәптән 600 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр гектарынан 130-ар бот һәм 300 гектарҙың һәр бер гектарынан 125-шәр бот урожай алырға.

«Новая деревня» колхозы—500 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Новая деревня» колхозының иптәш Карпов бригадаһы—40 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

Шевченко исемендәге колхозлың иптәш Мудрый бригадаһы — 150 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 200-әр бот урожай алырға.

«Новая деревня» колхозының иптәш Андриянова звеноһы — 15 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 190-шар бот урожай алырға.

Дәүләкән районы — яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 18 мең гектарға киңәйтергә. Тотош район буйынса 20.330 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 90—95-әр бот һәм 35.300 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 85—90-шар бот урожай алыуға өлгәшергә.

«Новая жизнь» колхозы — 653 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 130-ар бот, 275 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға.

Был районлың «Бик-Карамалы» колхозы — 540 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 350 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға.

Калинин исемендәге колхоз — 1000 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 108-әр бот һәм 600 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

Ворошилов исемендәге колхоз—924 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 340 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

«Новая жизнь» колхозының иптәш Стаханова звеноһы — 20 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 200-әр бот урожай алырға.

«Бик-Карамалы» колхозының иптәш Әлмитов бригадаһы — 1[illegible] гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 130-ар бот урожай алырға.

Калтасы районы — сәсеү майҙанын 5,5 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 4,4 мең гектарға киңәйтергә, 49.000 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә. Айырым участкаларҙа арыш майҙанының 5.000 гектарынла һәр бер гектарҙан 110-ар бот, 14.000 гектарында һәр бер гектарҙан 85-әр бот, 3 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот, 5 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алырға.

«Красный Таныш» колхозы — 160 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шар бот, 146 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 105-шәр бот һәм 35 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

Был районлың «Коммунар» колхозы—132 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот һәм 110 гектар яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

«Марал» колхозының иптәш Ильтубаев бригадаһы — 120 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 112-шәр бот урожай алырға.

«Коммун Корво» колхозының иптәш Г. Гайсин бригадаһы — 80 гектар яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 110-ар бот, 128 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 85-шәр бот һәм 5 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 84-әр бот урожай алырға.

«Союз» колхозының иптәш Кузьминых звеноһы — 12 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 20 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Сеятель» колхозының иптәш Мачнаева звеноһы — 8 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 156-шар бот һәм 3 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 102-шәр бот урожай алырға.

Асҡын районы — сәсеү майҙандарын 6.750 гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 3.250 гектарға киңәйтергә. 30 мең гектар бойҙай, арыш, борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 70—75-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә. Айырым участкаларҙа 3 мең гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот, 2 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 500 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға.

Был районлың «Бүләк» колхозы 1.340 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот, шул иҫәптән 70 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 151 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 136-шар бот һәм 56 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға йөкләмә алды.

«Ленинец» колхозы — 570 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот, шул иҫәптән 50 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 70 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 14 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

«Свобода Ильича» колхозының иптәш Казанцев бригадаһы — 25 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот, 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

«Кыҙыл юл» колхозының иптәш Абзалов бригадаһы 20 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 17 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 5 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға йөкләмә алды.

«Бүләк» колхозының иптәш Нурмөхәмәтов звеноһы 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға йөкләмә алды.

«Новый путь» колхозының иптәш Попов звеноһы — 24 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 8 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

Кушнаренко районы—яҙғы культуралар сәсеү майҙанын 8,9 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 7,1 мең гектарға киңәйтергә. Арыштың бөтә сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 78-әр бот, яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 72-шәр бот, ә айырым участкаларҙа 1.145 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 1.775 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға.

«Ирк» колхозы яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 330 гектарға киңәйтеп, уны 700 гектарға еткерергә һәм бөтә сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 87-шәр бот урожай алырға йөкләмә алды.

Ленин исемендәге колхоз — яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 277 гектарға киңәйтеп, уны 580 гектарға еткерергә һәм бөтә сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 81-әр бот урожай алырға.

«Коминтерн» колхозы — яҙғы бойҙай майҙанын 266 гектарға киңәйтеп, уны 580 гектарға еткерергә һәм бөтә сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 72-шәр бот, шул иҫәптән 48 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Байкал» колхозы — 310 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

«Байкал» колхозының иптәш Шәйхелисламов звеноһы—15 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 25 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Маҡар районы — сәсеү майҙанын 4,4 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 3,7 мең гектарға киңәйтергә. Бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә майҙанында һәр бер гектарҙан 80-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә. Айырым участкаларҙа 8,5 мең гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 85-шәр бот һәм 8.000 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алырға.

«Восток» колхозы — 105 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 130 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 110-ар бот урожай алырға.

Был районлың «Өлкәр» колхозы — 100 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 130 гектар яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 110-ар бот һәм 5 гектар борсаҡ майҙанының һәр гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

«Кыҙыл таң» колхозының иптәш Хисмәтуллин бригадаһы—100 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот, 85 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Өлкәр» колхозының иптәш Винокуров бригадаһы — 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот, 30 гектар арыш майҙанының һәр гектарынан 150-шәр бот һәм 5 гектар борсаҡ майҙанының һәр гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

«Восток» колхозының иптәш Чумакова звеноһы — 10 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 200-әр бот, 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Өлкәр» колхозының иптәш Исачкина звеноһы—20 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 12 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 200-әр бот урожай алырға.

Бөрө районы — сәсеү майҙанын 9 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 6 мең гектарға киңәйтергә. 30 мең гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә.

Был районлың «Урал» колхозы — 184 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 290 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Берия исемендәге колхоз — 185 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 114-әр бот һәм 200 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 114-әр бот урожай алырға.

«Урал» колхозының иптәш Климин бригадаһы — 80 гектар арыш һәм яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 132-шәр бот урожай алырға.

Дзержинский исемендәге колхозлың иптәш Минина звеноһы — 10 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 10 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Берия исемендәге колхозлың иптәш Мосунова звеноһы—42 гектар арыш һәм яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 144-әр бот урожай алырға.

(Дауамы 2-се биттә).

Башҡорт АССР-ы колхозсыларынан һәм колхозсы катын-кыҙҙарынан, МТС һәм совхоз работниктәренән, ауыл хужалығы специалистәренән

Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ Иосиф Виссарионович СТАЛИНГӘ

(Аҙағы, Башы 1-се биттә).

Мишкә районы — бөтә культураларҙың сәсеү майҙандарын 6.251 гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 4.970 гектарға киңәйтергә. Айырым участкаларҙа 2.500 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот, 16.000 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 80-шәр бот, яҙғы бойҙайҙың 2.100 гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 100-әр бот һәм 8.400 гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 80-шәр бот һәм 300 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

«1 Май» колхозы — 300 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 185 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Был райондың «III Интернационал» колхозы — 165 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 159 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот һәм 20 гектар борсаҡ майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алырға.

Ленин исемендәге колхоздың иптәш Андреев бригадаһы — 159 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 126-шәр бот, 72 гектар бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

«1 Май» колхозының иптәш Шамаев бригадаһы — 50 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 126-шар бот һәм 88 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 126-шар бот урожай алырға.

Андреев исемендәге колхоздың иптәш Рябов звеноһы — 10 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 10 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Ленин исемендәге колхоздың иптәш Айтузин звеноһы — 18 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 126-шар бот һәм 21 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 125-шәр бот урожай алырға.

Дүртөйлө районы — сәсеү майҙандарын 6,5 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 5 мең гектарға киңәйтергә. Бөтә бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот, шул иҫәптән яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан уртаса 75-әр бот урожай алыуға өлгәшергә.

Был райондың Буденный исемендәге колхозы — 245 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот, 200 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Ленин исемендәге колхоз — 235 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 105-шәр бот, 380 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 102-шәр бот урожай алырға.

«Ағым» колхозының иптәш Сарүәров бригадаһы — 60 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 82 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Урал» колхозының иптәш Тимерғәлиев бригадаһы — 50 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

«Кыҙыл таң» колхозының иптәш Саяпова звеноһы — 15 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот һәм 15 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

«Ағиҙел» колхозының иптәш Ғәрифуллина звеноһы — 10 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот һәм 10 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

Туймазы районы — бөтә культураларҙың сәсеү майҙанын 4 мең гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 3,8 мең гектарға киңәйтергә. Бөтә бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының һәр бер гектарынан 75—80-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә.

Айырым участкаларҙа 11 мең гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 75-шәр бот һәм 10 мең гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 80-шәр бот урожай алырға.

Был райондың «Тимер» колхозы — 130 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

Тукаев исемендәге колхоз—223 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 105-әр бот урожай алырға.

«Өсән-тамаҡ» колхозының иптәш Кәримов бригадаһы — 140 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

Фрунзе исемендәге колхоздың иптәш Юдин бригадаһы—118 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 105-шәр бот урожай алырға.

«Тимер» колхозының иптәш Ғәлиуллин звеноһы — 26 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға.

Янауыл районы — бөтә культураларҙың сәсеү майҙанын 13.693 гектарға, шул иҫәптән яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 7,6 мең гектарға һәм борсаҡ сәсеү майҙанын 1.189 гектарға киңәйтергә. Бөртөклө ашлыҡ культураларының бөтә сәсеү майҙанының һәр бер гектарынан 75-шәр бот урожай алыуға өлгәшергә.

Айырым участкаларҙа арыштың 7.000 гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 90-шар бот һәм 28 мең гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 81-әр бот, яҙғы бойҙайҙың 5 мең гектар майҙанында һәр бер гектарҙан 78-әр бот һәм борсаҡтың 4.550 гектар майҙанында һәр бер гектарынан 78-әр бот урожай алырға.

Был райондың Чкалов исемендәге колхозы — 246 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

«Союз» колхозы — 240 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 90-шар бот урожай алырға.

Чкалов исемендәге колхоздың иптәш Изибаев звеноһы — 29 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Ильич исемендәге колхоздың иптәш Гришина звеноһы — 22 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Башкортостандың түбәндә күрһәтелгән бөртөклө ашлыҡ һәм малсылыҡ совхоздары эшселәре һәм специалистәре юғары урожай үҫтереп алырға йөкләмә алалар:

Бүздәк бөртөклө ашлыҡ совхозы — бөртөклө ашлыҡ культураларының сәсеү майҙанын 3.151 гектарға киңәйтергә, 1.300 гектар яҙғы бойҙай һәм арыш майҙанының һәр бер гектарынан 178-әр бот урожай алырға.

Әлшәй бөртөклө ашлыҡ совхозы — бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү майҙанын 3.679 гектарға киңәйтергә, 1.354 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 150-шәр бот һәм 758 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Ҡаҙанғол орлоксолоҡ совхозы—1.700 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот һәм 751 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 120-шәр бот урожай алырға.

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы — бөртөклө ашлыҡ культураларының сәсеү майҙанын 4.795 гектарға киңәйтергә, 8.100 гектар бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан һәм 2.325 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға.

Ҡаҙанғол орлоксолоҡ совхозының иптәш Лапонов етәкселегендәге баҫыусылыҡ бригадаһы—107 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан һәм 150 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының РСФСР Верховный Советы депутаты иптәш Солонин етәкселегендәге звено — 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 210-ар бот һәм 60 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

Бүздәк бөртөклө ашлыҡ совхозының иптәш Хәмзин звеноһы — 50 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәм 50 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 198-әр бот урожай алырға.

БашЦИК исемендәге бөртөклө ашлыҡ совхозының иптәш Мальцев звеноһы — 30 гектар арыш майҙанының һәр бер гектарынан 186-шар бот һәм 20 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

«Красная Башкирия» бөртөклө ашлыҡ совхозының иптәш Саматов звеноһы — 30 гектар яҙғы бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 180-шәр бот урожай алырға.

Машина-трактор станциялары буйынса

Беҙ машина-трактор станцияларының эшен серьез рәүештә яҡшыртмайынса тороп сәсеү майҙандарын киңәйтеү һәм беҙҙең баҫыуҙарыбыҙҙың урожайлылығын ҡырҡа күтәреү буйынса алынған йөкләмәләрҙе үтәүҙе һәм арттырып үтәүҙе мөмкин түгел, тип һанайбыҙ.

1948 йылда республикабыҙҙың машина-трактор станциялары колхоздарҙа, 1947 йылға ҡарағанда, 1 миллион гектарға артығыраҡ ер эшкәртәсәктәр.

МТС һәм совхоз коллективтәре үҙҙәренең мөмкинлектәрен иҫәплап, республика буйынса 15 ат көслө һәр бер тракторҙың ер эшкәртеүен МТС-тарҙа уртаса 420 гектарға һәм совхоздарҙа 500 гектарға еткерергә йөкләмә алалар.

Алдынғы МТС-тар айырыуса юғары йөкләмәләр алалар:

Дәүләкән МТС-ы эшләп сығарыуҙы—900 гектарға; Байгужа, Приют, Суйынсы МТС-тары—800-әр гектарға; Ҡандра, Шәрип, Октябрь МТС-тары — 750-шәр гектарға; Кушнаренко, Аслыкүл, Туҡмаҡлы, Кәсәү, Ново-Троицк, Дүртөйлө, Дуван, Байкы, Ҡыйғы МТС-тары 700-әр гектарға; Иәрмәкәй, Стәрлетамаҡ, Усть-Икин, Аит, Федоровка, Ташлы күл, Шаранлы МТС-тары 600-әр гектарға еткерергә йөкләмә алалар.

Беҙҙең иң яҡшы трактор бригадаларыбыҙ үҙҙәренә тағы ла юғарыраҡ йөкләмәләр алалар:

Дәүләкән МТС-ының Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехин бригадаһы һәр бер тракторға 1100-әр гектар ер эшкәртергә, 250 гектар майҙанда 150-шәр бот һәм бөтә эшкәртелгән майҙанда 90-шар бот урожай алырға йөкләмә алды.

Баҙаң МТС-ының Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Рябов бригадаһы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртергә, 180 гектар майҙанда 132-шәр бот һәм бөтә эшкәртелгән майҙанда 108-әр бот урожай алырға йөкләмә алды.

Приют МТС-ының иптәш Ғәбдуллин бригадаһы һәр бер тракторға 1500 гектар.

Янауыл МТС-ының иптәш Әҙюнов бригадаһы, Суйынсы МТС-ының иптәш Латипов бригадаһы 1.300-әр гектар.

Ҡыйғы МТС-ының Әхмәтьянов һәм Фазлыев иптәштәрҙең бригадалары 1.100-әр гектар.

Дәүләкән МТС-ының Желобецкий, Рогачев иптәштәрҙең бригадалары, Октябрь МТС-ының Григуленко, Батыров һәм Шәрипов иптәштәрҙең бригадалары, Федоровка МТС-ының Палаев, Савкин иптәштәрҙең бригадалары, Ҡыйғы МТС-ының Ғәйфуллин һәм Хәлимов иптәштәрҙең бригадалары, Приют МТС-ының Мөхтәсәров, Вафин, Шаңғәрәев һәм Романов иптәштәрҙең бригадалары, Иәрмәкәй МТС-ының иптәш Шәрифуллин бригадаһы һәр бер тракторға 1000-әр гектар ер эшкәртергә йөкләмә алдылар.

Быңан тыш республика буйынса 300-ҙән артыҡ трактор бригадаһы 800-ҙән алып 1000 гектарға тиклем ер эшкәртеү йөкләмәһен алды.

Стахановсы комбайнерҙар 1948 йылда һәр бер комбайн менән түбәндә күрһәтелгәнсә урожай йыйырға һүҙ бирҙеләр: Чапаев МТС-ынан Шмаков, Иәрмәкәй МТС-ынан Ғаязов иптәштәр 1000-әр гектар, Таймаҫ МТС-ынан иптәш Резаев 900 гектар, Туймазы МТС-ынан иптәш Әхмәтов, Ермолаевка МТС-ынан иптәш Николаев 800-әр гектар, Приют МТС-ынан иптәш Емельянов, ике комбайн менән 1.500 гектар урожай йыйырға йөкләмә алдылар.

Шуның менән бергә МТС һәм совхоз работниктәре трактор эштәренең үҙҡә төшеү хаҡын кәметеү, яғыулыҡты экономияла тотоноу һәм һәр бер трактористең сменала эшләп сығарыу нормаһын үтәү буйынса бөтә сараларҙы күрәсәктәр.

3. Бөтә урожайҙы үҙ ваҡытында юғалтыуһыҙ йыйып алырға. Урожай йыйыуҙың тәүгә көндәренән үк государствоға иген тапшыра башлаясаҡбыҙ һәм иген әҙерләү планын 1948 йылдың 20 октябренә тулыһынса үтәйәсәкбеҙ.

4. 1948 йылдың көҙгө сезонында 950 мең гектар майҙанда туңға һөрәү үткәреп, 1949 йылда яҙғы бойҙай сәсеүлектәрен тулыһынса яҡшы эшкәртелеп туңға һөрөлгән ерҙәр менән тәьмин итәсәкбеҙ.

Малсылыҡ буйынса

Колхоз фермаларында мал һанын 1947 йылға ҡарағанда: мөгөҙлө эре малдарҙы 23,2 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 32,1 процентҡа, сусҡаларҙы 106 процентҡа, аттарҙы 15 процентҡа һәм ҡоштарҙы 173 процентҡа арттырырға.

Һәр бер йөҙ инә малдан: 47,2 ҡолон, 83,2 быҙау, 95 бәрәс, 700 баш сусҡа балаһы алып үҫтерергә.

Фуражлағы һәр бер һыйырҙан колхоздарҙа 1.300 литр һәм совхоздарҙа 1.700 литр һөт һауып алыуға, һәр бер һарыҡтан 2,6 килограмм йөн ҡырҡып алыуға өлгәшергә. 300 мең баш һарыҡты метизлаштерергә.

Иң мөһим малсылыҡ райондарының колхозсылары үҙҙәренә түбәндәге йөкләмәләрҙе алдылар:

Ҡыйғы районы — общественный малдар һанын: аттарҙы 16 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 31 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 42 процентҡа, сусҡаларҙы 150 процентҡа арттырырға, һәр бер 100 инә малдан: 60 ҡолон, 98 быҙау, 110 бәрәс, 1.200 баш сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.300 литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан кәм тигәндә 2,4 килограмм йөн ҡырҡып алыуға өлгәшергә.

Ҡыйғы районының Киров исемендәге колхозы — аттарҙы 24 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 33 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 77 процентҡа, сусҡаларҙы 180 процентҡа арттырырға һәм һәр бер 100 инә малдан: 100 ҡолон, 100 быҙау, 130 бәрәс, 1.400 сусҡа балаһы; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.600 литр һөт һауып алыуға, һәр бер һарыҡтан 3,5 килограмм йөн ҡырҡып алыуға өлгәшергә.

Әбйәлил районы — общественный малдар һанын: аттарҙы 20 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 22,6 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләр һанын 30,4 процентҡа арттырырға; һәр бер йөҙ инә малдан: 80 ҡолон, 90 быҙау, 115 бәрәс, 1.200 сусҡа балаһы алырға.

Дыуан районы — общественный мал һанын: аттарҙы 17 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 30 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 35 процентҡа арттырырға.

Һәр бер йөҙ инә малдан: 55 ҡолон, 90 быҙау, 115 бәрәс, 1.000 сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.400 литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан кәм тигәндә 2,8 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Учалы районы — общественный малдар һанын: аттарҙы 16 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 8 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 28,8 процентҡа, сусҡаларҙы 111 процентҡа арттырырға, һәр бер йөҙ инә малдан: 75 ҡолон, 95 быҙау, 115 бәрәс, 1.000 сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.200 литр һөт һауып алырға, һәр бер һарыҡтан кәм тигәндә 2,2 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Учалы районы «Кыҙыл партизан» колхозы — 1947 йыл менән сағыштырғанда аттар һанын 21 процентҡа, мөгөҙлө эре малдар һанын 19 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләр һанын 36 процентҡа, сусҡалар һанын 60 процентҡа арттырырға, һәр бер йөҙ инә малдан: 90 ҡолон, 100 быҙау, 115 бәрәс алырға.

Архангель районы — общественный малдар һанын: аттарҙы 16 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 17,6 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 22,6 процентҡа арттырырға, һәр бер йөҙ инә малдан: 49 ҡолон, 90 быҙау, 110 бәрәс һәм 900 сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.600 литр һөт һауып алырға; һәр бер һарыҡтан кәм тигәндә 2,8 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Иглин районы — общественный малдар һанын: аттарҙы 15,1 процентҡа, мөгөҙлө эре малдарҙы 13,7 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 24,9 процентҡа, сусҡаларҙы 81,4 процентҡа арттырырға; һәр бер йөҙ инә малдан: 50,2 ҡолон, 95 быҙау, 100 бәрәс, 800 сусҡа балаһы алырға, фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.800 литр һөт һауып алырға; һәр бер һарыҡтан кәм тигәндә 2,8 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Иглин районы «Путь Ленина» колхозы — һәр бер йөҙ инә малдан: 65 ҡолон, 120 бәрәс, 1.000 сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.900 литр һөт һауып алырға.

«Балажи» колхозы — һәр бер йөҙ инә малдан: 53 ҡолон, 100 быҙау, 120 бәрәс алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.800 литр һөт һауып алырға; һәр бер һарыҡтан 3,5 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

«Коминтерн» колхозы — һәр бер йөҙ инә малдан: 69 ҡолон, 100 быҙау, 110 бәрәс, 900 сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.700 литр һөт һауып алырға; һәр бер һарыҡтан 3 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Баймаҡ районы Каганович исемендәге колхоз — һәр бер йөҙ инә малдан: 97 ҡолон, 100 быҙау, 150 бәрәс алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.500 литр һөт һауып алырға.

Дәүләкән районы «Бик-Карамалы» колхозы — һәр бер 100 инә малдан: 80 ҡолон, 100 быҙау, 135 бәрәс алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.500 литр һөт һауып алырға.

Шул уҡ райондың Калинин исемендәге колхозы — һәр бер 100 инә малдан: 70 ҡолон, 90 быҙау, 120 бәрәс алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.600 литр һөт һауып алырға һәм һәр бер һарыҡтан 3,5 килограмм йөн ҡырҡып алырға.

Дим ит-һөтсөлөк совхозы — һәр бер 100 һыйырҙан 100-әр быҙау, һәр бер 100 бейәнән 80-шәр ҡолон, һәр бер 100 һарыҡтан 120-шәр бәрәс, һәр бер инә сусҡанан 16-шар сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.800 литр һөт һауып алырға, шул иҫәптән, 64 һыйырҙан 3-әр мең литр һөт һауып алырға.

БашЦИК исемендәге бөртөклө ашлыҡ совхозы — һәр бер 100 һыйырҙан 91-әр быҙау, һәр бер 100 бейәнән 85-әр ҡолон, һәр бер 100 һарыҡтан 120-шәр бәрәс, һәр бер инә сусҡанан 12-шәр сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 2-шәр мең литр һөт һауып алырға.

«Ҡарламан» сусҡасылыҡ совхозы — һәр бер 100 һыйырҙан 90-шар быҙау, һәр бер 100 бейәнән 80-шәр ҡолон, һәр бер 100 һарыҡтан 150-шәр бәрәс, һәр бер инә сусҡанан 14-әр сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.880-шәр литр һөт һауып алырға; һәр бер умартанан 50-шәр килограмм бал алырға.

Дәүләкән бөртөклө ашлыҡ совхозы — һәр бер 100 һыйырҙан 90-шар быҙау, һәр бер 100 бейәнән 80-шәр ҡолон, һәр бер 100 һарыҡтан 110-ар бәрәс, һәр бер инә сусҡанан 12-шәр сусҡа балаһы алырға; фураждағы һәр бер һыйырҙан 1.800-әр литр һөт һауып алырға.

5. Общественный малсылыҡты артабан күтәреү һәм уның продукт биреүсәнлеген арттырыу маҡсатында һәр бер атҡа кәм тигәндә 35 центнер ҡаты аҙыҡ (бесәнгә әйләндергәндә) һәм 3 центнер һутлы аҙыҡ, һәр бер һыйырға 27 центнер ҡаты аҙыҡ һәм 35 центнер һутлы аҙыҡ, һәр бер һарыҡҡа 4,5 центнер ҡаты аҙыҡ һәм 1 центнер һутлы аҙыҡ әҙерләйәсәкбеҙ.

6. Ит, һөт һәм малсылыҡтың башҡа продукттарын тапшырыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда, Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллығына үтәргә.

7. Башкорт Автономиялы Совет Социалистик республикаһында культуралы баҡсасылыҡты үҫтерәсәкбеҙ. 1948 йылда 670 гектар майҙанда емеш-еләк, шул иҫәптән Өфө районында 65 гектар, Иглин районында 40 гектар, Бөрө районында 35 гектар, Стәрлетамаҡ районында 31 гектар һәм Кушнаренко районында 30 гектар емеш-еләк ултыртасаҡбыҙ.

Һеҙҙе, тыуғаныбыҙ Иосиф Виссарионович, Башкортостан колхозсылары, колхозсы катын-кыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәрҙәр һәм һөйөклө Тыуған илебеҙгә күберәк иген, ит, һөт, йөн, йәшелсәләр һәм ауыл хужалығының башҡа продукттарын бирерҙәр, тип ышандырабыҙ.

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең тыуған большевиктәр партияһы!

Йәшәһен беҙҙең тыуған атайыбыҙ, учителебеҙ һәм дуҫыбыҙ иптәш Сталин!

Хат Башкорт АССР-ы колхозсылары, колхозсы катын-кыҙҙары, МТС һәм совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәренең дөйөм йыйылыштарында тикшерелде һәм кабул ителде.

Партия тормошо

Предприятиене хужалыҡ иҫәбенә күсереү өсөн көрәштә

Мәскәү ҡалаһының алдынғы заводтары директорҙарының Государственная дотация алмайынса эшләүгә саҡырыуҙарын Ишембай үҙәк электростанцияһының эшселәре, инженер һәм техник работниктәре ҡайнар хуплап ҡаршы алдылар. Партия ойошмаһы коллективтең был патриотик ынтылышына дөрөҫ йүнәлеш бирҙе.

Хужалыҡ иҫәбен нығытыу һәм шуның менән рентабелле эшләүгә өлгәшеү өсөн көрәш бөтә киңлегендә йәйелдерелде. Партбюро рентабелле эшләү мәсьәләһен партия группаларында, цех йыйылыштарында тикшереүҙе ойоштороҙо.

Агитаторҙар производство темаларына беседалар үткәрҙеләр, цех һәм бригадаларҙы файҙалы эшләүгә саҡырҙылар. Мәскәүҙең «Компрессор» заводы көйөү цехы начальнигы иптәш Федоровтың үҙ цехының хужалыҡ иҫәбенә күсеүе тураһындағы сығышын агитаторҙар бик урынлы файҙаландылар. Стена газетаһы экономия режиме мәсьәләһен принципиаль юғарылыҡҡа күтәрҙе. Тәнкит һәм үҙ-үҙеңде тәнкит киң йәйелдерелле, ҡайһы бер кешеләрҙең материалдар менән һаҡһыҙ тотоноуҙарының ғәйепләнде. Бер үк ваҡытта, алдынғыларҙың эш тәжрибәләре бөтә коллективҡа еткерелде.

Һөҙөмтәлә, февраль аҙағында бөтә цехтар ҙа хужалыҡ иҫәбенә күсеүгә өлгәштеләр. Партия ойошмаһы бөтә коллективте технологик процестарҙы камиллаштереүгә һәм яңы техник алымдарҙы ҡулланыуға мобилизовать итте. Күп тә үтмәне, электриктәр 50 рационализаторлыҡ тәҡдимде индерҙеләр. Баш инженер иптәш Тихонов етәкселегендә уларҙы эштә ҡулланыу саралары күрелде.

Рационализаторлыҡ тәҡдимдәренең 7-һе эштә ҡулланыла башланы. Был тик март айында ғына 47.200 һум экономия бирҙе.

Партгруппорг иптәш Ф. С. Кононов мейескә яғыу эшен еңелләйтеүҙең яңы схемаһын үткәрергә тәҡдим итте. Ул метод йылға 18.200 һум экономия бирәсәк. Слесарь В. А. Чубук, цех начальнигы Н. А. Колосков иптәштәр ҙа бик ҡиммәтле тәҡдимдәр индерҙеләр.

Коммунистәрҙең инициативаһы менән ике агрегатты — төп ҡаҙанды һәм турбинаны бер үк ваҡытта ремонтлау ойошторолдо. Беренсе тапҡыр ҡулланылған был метод 45 мең һумға экономия яһарға мөмкинлек бирҙе, ремонт срогы 2 тапҡырға ҡыҫҡарҙы.

Партия ойошмаһы (секретары иптәш Ишмөхәмәтов) билдәләнгән ойоштороу-техник сараларҙың үтәлешенә ныҡлы контроль булдырҙы. Күптән түгел үткәрелгән партия-хужалыҡ активе йыйылышында рентабелле эшләү өсөн көрәштең һәм хужалыҡ иҫәбенә күсерелгән цехтарҙың эштәренең йомғаҡтары тикшерелде. Һөҙөмтәлә, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы план менән билдәләнгәнгә ҡарағанда 4.98 процентҡа кәмене, хужалыҡ иҫәбенә күсеү һөҙөмтәһендә 42 мең һум экономия яһалды.

Партия ойошмаһының етәкселегендә үҙәк электр станцияһы культуралы предприятиеға әйләнде. Ул I квартал планын 105 процентҡа үтәне, план менән билдәләнгән 700 мең урынына 1 миллион 100 мең һум файҙа бирҙе.

К. Хәмитов.

Лекторийҙең һөҙөмтәле эше

ВЛКСМ-дың Молотов район комитеты һәм район мәғариф бүлеге тарафынан 1947 йылдың 1 ноябрендә ойошторолған йәштәр лекторийының эше тамамланыу айҡанлы ошо көндәрҙә район йәштәренең кисәһе булып үтте.

Кисәлә 300-ҙән артыҡ кеше ҡатнашты. Ҡатнашыусылар иптәш Григорьевтең халыҡ-ара хал тураһындағы докладын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар. Унан һуң ВЛКСМ-дың Молотов райкомы эргәһендәге лекторҙар группаһы етәксеһе иптәш Юхвид лекторийҙең эш йомғағы тураһында сығыш яһаны.

— Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә лекторий ҙур ғына эштәр эшләне. «Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы», «СССР-ҙың тышҡы политикаһы», «Совет әҙәбиәте» һәм башҡа тәбиғи-фәнни темаларға бөтәһе 16 лекция үткәрелде. Лекцияларҙы һәр ваҡыт 400—500 кеше тыңланы, — тине иптәш Юхвид.

Йәштәр киләсәктә бигерәк тә фәнни-тәбиғи темаларға, музыка һәм искусство тураһында лекциялар ойоштороу теләген әйттеләр.

Т. Хөсәйнов.

Токарь Козлов



Смена башланырға байтаҡ ваҡыт бар әле. Ә эш өсөн бөтәһе лә әҙер. Станок таҙартылып, майланып ҡуйылған. Ләкин алдынғы токарь станокты һаман да көйләй, таҙарта.

Эш башланды. Станок хәрәкәткә ебәрелде. Эшсе суппортты һалмаҡ ҡына алға, ғыҙытылып ҡуйылған металл киҫәге яғына күсерҙе. Ҡырғыс тимерҙе ҡыра, алға шыуа, кире артҡа сигенә, тағы ла алға китә. Әлегә тиклем ҡапҡара булған тимер киҫәге формаға инә һәм ялтырай.

Токарь ашыҡмай һымаҡ күренә. Ләкин станокта тимер киҫәктәре бер-бер артлы алмашыналар. Эшкәртелгән деталдәрҙең һаны артҡандан-арта бара. Смена аҙағына тиклем улар тағы ла күбәйҙе.

Техник контроль бүлегенең контролеры әҙерләнгән продукцияның сифатын тикшерҙе. Бер генә брак та юҡ.

— Эш сифаты яҡшы, бик яҡшы, — ти контролер һәм ҡабул итеп алынған деталдәрҙең һанын яҙа. Норма өс тапҡырға арттырып үтәлгән. Токарь иптәш Михаил Тимофеевич Козлов был производство уңыштарын Беренсе Май хөрмәтенә бағышланы.

— Иптәш Козлов заводтың алдынғы стахановсыларының береһе. Ул үҙенең биш йыллыҡ нормаһын үтәп, икенсе биш йыллыҡ иҫәбенә эшләй,— ти заводтың баш инженеры иптәш Васильев. — Ул тик юғары сифатлы продукция етештерә. Беҙ уны үҙ сифат контроленә күсерергә ҡарар итеп, уға, уның фамилияһы яҙылған махсус сифат клеймоһы эшләп бирҙек. Хәҙер иптәш Козлов эшкәрткән деталдәрҙе элекке кеүек техник контроль бүлегенә тапшырмай, уларға үҙенең сифат клеймоһын ҡуя.

Һүрәттә: Өфө металл штамплау заводының стахановсы токаре иптәш М. Т. Козлов.

С. Мәүлютов тексы.
В. Жданов фотоһы.

Горняктәрҙең стахановсы хеҙмәттәре

Учалы рудниге горняктәре араһында йәйелдерелгән Май алды социалистик ярышы яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Коллектив биш айлыҡ производство планын апрелдең тәүге яртыһында үтәне. Еңеү көнөн [illegible]

[illegible] ... ван алда, арттырып үтәнеләр. Маҡтаулы забойщик Миронов алты айлыҡ нормаһын дүрт айҙа — 114, Ржев — 117, Мостафин — 111 процентҡа тамамланылар.

Учалы руднигенең коллективе үҙҙәренең эске ресурстарын, производство мөмкинлектәрен иҫәпләп, 1948 йылдың планын срогынан алда үтәү йөкләмәһен алды. Ленин исемендәге старателдар ар[illegible]

[illegible] Сталинға биргән вәғәҙәләрен намыҫлы рәүештә үтәү өсөн бөтә көстәрен һалып эшләйәсәктәр.

Н. Рыбаков,
Учалы руднигенең начальнигы.

Биш айлыҡ план—дүрт айҙа

Октябрь революцияһы исемендәге судолар ремонтлау заводы коллективе (директоры иптәш Видецкий) Еңеү көнөн үҙенең биш айлыҡ производство планын байтаҡ арттырып үтәү менән билдәләне. Завод үткән йылға ҡарағанда быйыл 900 мең һумдан артыҡ валовой продукция бирҙе.

Начальнигы иптәш Иванов булған цех коллективе социалистик ярышта алдынғы урынды тота. Цехтың бөтә эшселәре лә нормаларын арттырып үтәйҙәр. Мастер иптәш Кузякин етәкселегендәге электросварщиктар бригадаһы апрель айында заданиене бер ярым тапҡырға тамамланы. Электросварщик Мандрусов, Беспалов, Мигунов туғыҙ айлыҡ, столяр-модельщик В. Шеломенцев, котельщик И. Гуськов биш йыллыҡ норма үтәнеләр.

Стахановсы И. Данилов, Соломатин, Иванов, Тәхбәтуллин иптәштәр ҙә юғары хеҙмәт өлгәләре бирәләр.

Завод СССР йылға флоты предприятиелары араһында валовой продукция сығарыу һәм ремонттың сифаты яғынан алдынғылар рәтендә бара. Коллектив йыллыҡ планды 1 декабргә тамамлау өсөн көрәшә.

Ҷ. Ситников.

Тимер юл бүлегенең алдынғы кешеләре

Был көндәрҙә Өфө тимер юл бүлегенең производство алдынғылары поездар үткәреүҙе тиҙләтеү һәм производство пландарын арттырып үтәү менән билдәләнәйҙәр. Вагон участкаһында алдынғылыҡты Ҡандра станцияһы техник осмотр пункты (начальнигы иптәш Ильин) тотоп килә. Өлкән осмотрщик Иванов сменаһы вагондарҙы тотҡарлыҡһыҙ рәүештә эшкәртеүҙе тәьмин итә. Тик һуңғы декадала ғына был сменаның эшселәре талыған кейенсә алты вагонды ремонтланылар. Стахановсы осмотрщиктар Ханнанов, Әюпов, слесарь Мөхәмәтьянов, Рафиҡова, Фәхретдинова, Мәүлетдиновтар профессиялар буйынса иң яҡшы исемде үҙҙәрендә һаҡлап киләләр.

Өфө станцияһының йөк тейәү контораһы коллективе йөк тейәүҙең квартал планын һәм апрель заданиеһен 111,7, йөк бушатыуҙы 107 процентҡа үтәне. Йөк тейәү байтаҡ артты. Өлкән весовщик Мәҡсүтов, таксировщик Андреева, кассир Кабиров, Ефимова иптәштәр һәр ваҡыт алдынғылар сафында баралар.

М. Левитин.

Башҡортостан игенселәре! Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәгә тоғро булайыҡ!

Яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк һәм яҡшыраҡ үткәрәйек!

Бойҙай иң яҡшы ерҙәргә генә сәселә

Дәүләкән районы колхоздары быйыл ҡиммәтле культура булған бойҙай сәсеү майҙанын ике тапҡырға, тип әйтерлек арттыралар.

Игенселәр уҙған йыл юғары урожай өсөн көрәштә тупланған бай тәжрибәләрен быйыл яҙғы сәсеүҙә киң ҡулланалар. Мәҫәлән, «1 Май» колхозында 400 гектар бойҙай иң яҡшы агротехник сроктарҙа сәселде һәм шуның 76 гектары ҡара парға, 67 гектары беренсе тапҡыр һөрөлгән сиҙәмгә һәм ҡалғандары икенсе тапҡыр һөрөлгән сиҙәмгә урынлаштырылды. «Горный труд», «Красная Армия», «Ҡыҙыл байраҡ», «Коммунар» колхоздарында ла бойҙай иң яҡшы агротехник сроктарҙа ҡара парға һәм сиҙәм ерҙәренә генә сәселде.

Колхоздар орлоҡ участкаларында сәсеүҙе беренсе нәүбәттә үткәрәләр.

Туңға һөрөлгән ерҙәргә сәсеү алдынан культивация үткәрелә һәм яңынан тырматыла. Агрономдар һәм колхоз председателдәре сиҙәм ерҙәрҙең тәрән һөрөлөүенә нығыҡлы контроль яһайҙар. 20—22 сантиметрҙан да һай һөрөүгә юл ҡуйылмай.

Быйыл арҡылы-буй итеп сәсеү киң ҡулланыла. «Новая жизнь» колхозы 200 гектар майҙанда, «1 Май» колхозы 200 гектар, «Горный труд» колхозы 160 гектар майҙанда бойҙайҙы арҡылы-буй итеп сәсте.

Уҙған йыл орлоҡ участкаларынан юғары урожай алыу быйыл колхоздарға бары тик сортлы орлоҡтар ғына сәсеүгә, сәсеү нормаларын нык һаҡлауға мөмкинлек бирә. Алдынғы колхоздарҙа дифференциаль сәсеү нормаһы киң ҡулланыла. Ҡара пар, туңға һөрөлгән һәм башҡа уңдырышлы участкалар өсөн сәсеү нормаһы арттырыла, ә уңдырышһыҙ ерҙәрҙә ул кәметелә.

Күп кенә колхоздар быйыл көтөүлек ерҙәрен һөрөүҙе башҡаралар. Был ерҙәргә тәүге беренсе һәм икенсе йылдарҙа бойҙай үҫтерелгәндән һуң, күп йыллыҡ үлән сәселәсәк.

Ә. Әхмәров.

Сәсеүҙә мөгөҙлө эре малдар файҙаланыла

БӨРӨ. (Телефон аша). «Урал» колхозында сәсеү юғары темп менән бара. Бөтә эштәрҙә лә [illegible] Михаил Костылев, Константин Одинцов, Павел Климин, Михаил Плотников сәскестәрҙә эшләп, көнөнә 3 гектар урынына, 5-әр гектар ашлыҡ сәсәләр.

Сәсеүҙе ирта срокта тамамлау өсөн колхоз бөтә көстө, шул иҫәптән мөгөҙлө эре малдарҙы ла файҙалана. Баҫыуҙа 40 үгеҙ эшләй. Улар менән Мымрин һәм Александр Климин иптәштәр [illegible] бер гектар урынына, өсәр гектар ер тырмалайҙар. Культивациялауҙа ла норма көн һайын ике тапҡырға арттырылып үтәлә.

М. Гуревич.

Хаталарҙы тиҙ төҙәтергә

БОРАЙ. (Телефон аша). Райондың колхоздарында массовый рәүештә сәсеү эштәре бара. Алдынғы колхоздарҙа ул ҙур ойошҡанлыҡ менән үтә. «Идеал» колхозында 180 гектар, «Сарсаз» колхозында 150 гектар, «Ҡыҙыл Октябрь» колхозында 130 гектар иртә культуралар сәселде.

Алдынғы трактор бригадалары эшкә башлауҙың тәүге көндәрендә үк смена заданиеларен арттырып үтәйҙәр. 7 майға тракторҙар паркы менән 500 гектарҙан артыҡ ашлыҡ сәселде, 1200 гектар ер һөрөлдө һәм 500 гектар майҙанда культивация үткәрелде.

Борай МТС-ының «Мәҙәниәт» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Ғилмияров етәкселек иткән трактор бригадаһы баҫыу эштәрен ике сменалы ойошторҙо. Был бригаданың трактористоренән Бадамшин, Ғаязов иптәштәр үҙ тракторҙарын тулы ҡеүәтендә файҙаланалар. Улар смена заданиеларен көн һайын арттырып үтәйҙәр.

Ләкин күпселек колхоздарҙа һәм трактор бригадаларында баҫыу эштәрен һуҙалар. «Яңы ил» колхозын хеҙмәтләндереүсе Үләй МТС-ының иптәш Ғәбәйҙуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы трактористоре 10 көндән бирле инде «баҫыу эштәрен башларғамы, әллә тағы аҙыраҡ көтөргәме» тип һүҙ көрәштереп, ваҡытты бушҡа уҙғаралар. Колхоз председателдәре лә һәм МТС етәкселәре лә уларға килешеп ҡарайҙар, был бригаданан эшкә башлауҙы талап итмәйҙәр.

«Нептун», «Яңауыл», «Новый путь», «Ватан» колхоздары баҫыуҙарында ла массовый рәүештә сәсеү эштәре алып барырға тулы мөмкинлектәр бар. Ләкин был колхоздарҙың етәкселәре лә ашыҡмайҙар әле. «Яңауыл» колхозында, ягыулыҡ булмағанлыҡтан, тракторҙар тик ултыралар. Колхоз председателе иптәш Саяпов ягыулыҡ тураһында алдан хәстәрлек күрмәгән кеүек үк, хәҙер ҙә бер ниндәй ҙә сара күрмәй.

Ҡайһы бер колхоздарҙа баҫыу эштәренең сифатына иғтибар бирелмәй, агротехниканы боҙалар. Мәҫәлән, «Бальяз» колхозында 8 гектар бойҙайҙы ҡул менән сәстеләр. «Новый путь» һәм Тельман исемендәге колхоздарҙа хеҙмәтте звено системаһында ойоштороуҙы баһаламайҙар. Ҡыш көнө ойошторолған звенолар хәҙер тараллылар, улар үҙ участкаларын белмәйҙәр.

Баҫыу эштәрендә аттарҙан башҡа 1500 баш мөгөҙлө эре мал файҙаланылырға тейеш. Ләкин эш аттары бик аҙ булған «Ҡыҙыл яр», «КИМ» кеүек колхоздарҙа ла мөгөҙлө эре малдарҙы баҫыу эштәрендә файҙаланмайҙар.

Ғ. Ишметов.

Күп йыллыҡ үлән сәсеүҙе тиҙерәк тамамларға

Күп йыллыҡ үлән орлоҡтарының етешмәүе республикабыҙҙың колхоздарында сәсеү әйләнешен үҙләштереүҙә тотҡарлыҡ яһаусы төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Шуға күрә лә үлән сәсеү майҙанын киңәйтеү һәм уның урожайын күтәреү юлы менән күп йыллыҡ үлән орлоҡтары етештереүҙе арттырыуға һәр бер колхозда ныҡлы иғтибар бирелергә тейеш.

Ағымдағы йылда республикабыҙҙың колхоздары 133 мең гектар майҙанда үлән сәсергә тейештәр ине. Иң яҡшы сроктар үтеүгә ҡарамаҫтан, сәсеү планы ни бары 10,4 процентҡа ғына үтәлде. 28 районда ошо көнгә тиклем бер гектар ҙа үлән сәселгәне юҡ. Әлшәй районы колхоздары хатта май айының тәүге ун көнөндә генә 3 мең гектар сәсә алалар, ә бында ни бары 271 гектар үлән сәселде. Бөрө районы колхоздары ла планды бары 1,2 процентҡа үтәнеләр. Ҡандра, Ауырғазы, Борай, Илеш, Краснокама, Балабай, Шаран районларының колхоздары был культураны бөтөнләй баһаламайҙар. Улар үлән сәсеүгә әле булһа башламағандар. Ҡандра районында колхоздарҙың үҙҙәренең 200 гектар майҙанға етерлек орлоҡтары булыуы өҫтөнә, государство тағы ла 300 гектар майҙанға етерлек орлоҡ бирҙе. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, районда ошо көнгә тиклем бер гектар ҙа үлән сәселмәгән. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Хәмитов һәм баш агроном Таһиров иптәштәр был эштә үҙҙәрендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр, колхоз етәкселәренән планды үтәүҙе талап итмәйҙәр.

Колхоздар быйыл орлоҡ өсөн 18 мең гектар майҙанда үләнде бер ниндәй ҡушымтаһыҙ сәсергә тейештәр. Район һәм колхоз етәкселәре был мөһим сараны үткәреүгә лә сиктән тыш яуапһыҙ ҡарайҙар. Стәрлетамаҡ, Ҡалтасы, Асҡын кеүек районлар йыл һайын государствонан үлән орлоғо алып килеүҙәренә ҡарамаҫтан, үҙ орлоҡтарын булдырыу сараһын күрмәйҙәр, быйыл да орлоҡ өсөн бер генә гектар ҙа үлән сәсмәйҙәр. Ҡайһы бер районлар хатта государство тарафынан бүленгән орлоҡто ла ошо көнгә тиклем алып бөтмәгәндәр юҡ. Ауырғазы районы 54 центнер, Туймазы районы 41 центнер, Баҡалы районы 95 центнер үлән орлоғон [illegible] ала алмаған.

Үлән сәсеү планын бер һүҙһеҙ үтәү өсөн район һәм колхоз етәкселәре ашығыс саралар күрергә тейештәр. Район ауыл хужалығы бүлеге һәм МТС агрономдары колхоздарға был эште ойоштороуға һәм һәр бер колхоздың ошо көндән эшләп [illegible] планды тулыһынса үтәүен тәьмин итергә бурыслылар.

Н. Руднев,
БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының бөртөклө һәм майлы культуралар бүлеге начальнигы.

Колхозсыларҙың хеҙмәте ойошторолмаған

Воскресен районы колхоздарында хеҙмәтте ойоштороуға иғтибар итмәйҙәр. Дөрөҫ, ВКП(б) райкомы һәм район Советы исполкомы был турала бер-нисә тапҡыр ҡарарҙар сығарҙы һәм бөтә колхоздарҙа ла звенолар ойошторолдо. Ләкин улар хәҙер эшләмәйҙәр.

Бына «Алға» колхозы. Бында уҙған йыл юғары урожай алыуға өлгәшкән орлоҡсолоҡ звеноһы (етәксеһе иптәш Нәзифә Мөхәмәтова) эшен быйыл да яҡшы ойошторған. Ләкин колхоздағы башҡа звенолар тик ҡағыҙҙа ғына ҡалғандар. Колхоз председателе иптәш Рафиков:

— Баҫыусылыҡ звеноларында улай эшләп булмай. Хеҙмәтте иҫәпләүҙе ҡыйын,—ти.

Күп кенә колхозсылар баҫыу эштәрендә ҡатнашмайҙар. Хеҙмәткә яраҡлы 146 кешенең тик 45—50-һе генә эшкә йөрөй. Ә башҡа колхозсыларҙың ҡайҙа һәм нимә менән шөғөлләнеүе белеүсе юҡ. Эштә ҡатнашыусы колхозсылар ҙа көндәлек нормаларын тик 30—40 процентҡа үтәү менән генә сикләнәләр, сифатҡа иғтибар бирелмәй. Эштә индивидуаль һәм вак группалар сдельщина ҡулланылмай. Социалистик ярыш ойошторолмаған. «Ҡыҙыл таҡта» юҡ, стена газеталары, «боевой листок»тар сығарылмай. Бригадаларҙа һәм звеноларҙа агитаторҙар беркетелмәгән.

Колхозда шулай уҡ тартыу көстәре лә тулы файҙаланылмай. 12 баш аттың 6-һы ғына баҫыу эшендә ҡатнаша. Ә мөгөҙлө эре мал эшкә бөтөнләй ылыҡтырылмаған.

Колхозсыларҙың хеҙмәтен ойоштормау баҫыу эштәрен өҙөүгә килтерҙе. График үтәлмәй. Тәүге биш көнлөктә бында 54 гектар урынына, ни бары 1,64 гектар ер һөрөлдө, 12 гектар иген сәселде.

Бындай тарҡаулыҡ «Алға» колхозында ғына түгел, районның башҡа колхозларында ла бар. Мәҫәлән, «Ҡыҙыл яр» колхозында хеҙмәткә яраҡлы 76 кешенең 35—45-е, «Ленин юлы» колхозында 71 кешенең 20-һе генә баҫыу эшендә ҡатнаша.

Һөҙөмтә асыҡ. Районда тик 200 гектар ер һөрөлдө, 57 гектар ашлыҡ сәселде. Шулай итеп, графиктең яртыһы ла үтәлмәне.

Яҙғы баҫыу эшенең бындай насар барышына колхоз етәкселәре генә түгел, район етәкселәре лә борсолмайҙар. [illegible]

Воскресен районы колхоздарында баҫыу эштәренең тарҡау барыуы ашығыс саралар күреүҙе талап итә.

Ғ. Ибраһимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Яуапһыҙлыҡ һөҙөмтәләре

1. Ильясов борсолмай...

Тракторҙарҙың ватылып ултырыуҙары Бишбүләк МТС-ында ғәҙәттәге бер хәлгә әүерелгән. Быға бер кем дә борсолмай. Трактористар машинаның теҙәклегә өсөн яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр. Асылгәрәев Әхсән бригадаһында «СТЗ» тракторы өс көн ватылып тик торҙо. Уның маховиге насар эшләй башлай. Шунда уҡ тракторҙы туҡтатырға һәм уны төҙәтеү сараһын күрергә кәрәк ине. Ләкин тракторист Василий Иванов быны эшләмәй. Күп тә үтмәй, трактор ватылып туҡтай. «Коммунар» колхозында «СТЗ» тракторының подшипнигы өс тапҡыр иретелә. Тракторҙар яғыулыҡ булмау, хатта һыу килтерелмәү арҡаһында ла йыш ҡына тик торалар. Күп урында таңға эш ойошторолмаған. Шунлыҡтан хеҙмәт етештереүсәнлеге ғәйәт түбән. «Маяҡ» колхозын хеҙмәтләндереүсе Иван Артемьевтең бригадаһы дүрт көн эсендә ни бары ике гектар ер һөрҙө. Киров исемендәге колхозда «НАТИ» тракторы 10 көндә 9 гектар ғына ер эшкәртте. Һөҙөмтәлә Бишбүләк МТС-ы көндән-көнгә графиктә аҙа. МТС тәүге биш көнлөктә 1000 гектар ер һөрөргә һәм 950 гектар сәсергә тейеш ине. Ул 10 майға ни бары 315 гектар ер һөрҙө һәм 202 гектар ашлыҡ сәсте.

МТС директоры иптәш Ильясов был хурлыҡлы артта ҡалыуҙы бөтөрөһе һәм тракторҙарҙың нормаль эшләүен тәьмин итәһе урынына, «үткән йылға ҡарағанда яҡшыраҡ эшләйбеҙ», тип үҙен-үҙе тынысландыра. Ильясовтың большевиктарға хас булмаған бындай ҡылығына ВКП(б)-ның Бишбүләк район комитеты һәм район Советы башҡарма комитеты килешеп ҡарайҙар. Механизаторҙарҙың эшендәге борола алмаусылыҡты һәм үҙ-үҙенде тынысландырыу факттарын ҡырҡа бөтөрөү өсөн конкрет сара күрмәйҙәр.

2. Агроном килде...

Яңы ғына һөрөлгән ер башында ҡыҙыу бәхәс бара. «XVII партсъезд» исемендәге колхоздың председателе Егор Макаров, ҡыҙып-ҡыҙып һөйләй:

— Участогығыҙҙы ҡабул итмәйем, — ти ул трактор бригадаһы бригадиры Ҡотошовҡа. — Күпме сей ҡалдырылған, мөйөштәргә бөтөнләй һабан теймәгән, ә уртала ат менән бер көн һөрөрлөк ерҙе ҡалдырып киткәнһегеҙ. Быны һөрөү тормыштан ҡара, бер сирек тә юҡ та баһа.

Ә бригадир уны тыңларға ла теләмәй.

— Ҡабул итмәһәгеҙ, икенсе колхозға китермен, — ти ул. — Сей ҡалған ерҙе ат менән һөр. Уның өсөн дә трактор ҡыуып хәлем юҡ. Миңә планды тултырырға, яғыулыҡҡа экономия яһарға кәрәк. Ә һеҙ графиктан өҙәлөүен, яғыулыҡтың артыҡ расходланыуын теләйһегеҙме?

Шул ваҡыт, баҫыуға МТС-тың өлкән агрономы Трофимов яҡынлап килә ине. Ҡотошовтың йөҙө асылып китте.

— Ана, үҙе килә, ул дөрөҫөн әйтер.

Председатель үҙенең һүҙҙәрен агрономға тағы ла бер тапҡыр ҡабатланы.

— Һин артыҡ ҡыуып, сифатҡа зарар килтерергә кемдең хаҡы бар? Был агротехниканы боҙоу, колхоз менән төҙөлгән договорҙы һанға һуҡмау була бит, егеттәр.

Ғәжәпкә ҡаршы, агроном бригадирҙе яҡланы.

— Сей ҡалған урындарын ат менән һөрөргә тура килер, иптәш Макаров. Шулай ҙа, тәрәнерәк һөрөргә ярай.

Колхозсылар менән механизаторҙар араһында бәхәс бында бик йыш була. Трактористар күп ваҡыт агротехниканы боҙалар. Бөтә бригадаларҙа ла предплужниктар алып ташланған, сей ҡалдырып һөрөү ғәҙәткә инеп киткән. Мәҫәлән, Тельман исемендәге колхозда иптәш Кудряшов етәкселек иткән трактор бригадаһы 50 гектар майҙанды предплужникһеҙ һәм һай һөргән. Был колхозда МТС-тың участка агрономы Титов һәм директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары Зарянов иптәштәр булып киткәндәр. Ләкин трактористар эшендәге был серьез етешһеҙлекте «күрмәгәндәр». «Мал-ала», Красная Армия, Буденный, Жданов исемендәге һәм башҡа күп колхоздарҙа ла агротехниканы боҙоп эшләйҙәр. Ә МТС-тың агрономдары был хәлгә бер ҙә борсолмайҙар. Сөнки өлкән агроном Трофимов һәм МТС директоры Ильясов иптәштәр агрономдарҙың юғары урожай өсөн көрәштән ситтә тороуҙарына үҙҙәре килешеп ҡарайҙар.

3. Сменанан һуң

Смена бөткәс, Василий Филимонов һәм Сергей Дмитриев иптәштәр һаламдан эшләнгән ҡыуышҡа ҡайттылар. Ашағандан һуң, тәмәке көйрәтеп алғас, Филимонов һүҙ ҡушты:

— Әх, Сережа, газета уҡырға ине.

— Мин дә баш тартмаҫ инем, Вася, юҡ бит, ҡайҙан алаһың?

— Агитатор ҙа күренмәй, исмаһам.

— Баҫыуға сыҡҡас, партия ойошмаһы онотто беҙҙе.

Бик урынлы үпкәләү. Бишбүләк МТС-ының трактористәре араһында массовый-политик эш алып барылмай. Бригадаларҙа газета-журналдар, художестволы һәм политик әҙәбиәт китаптары юҡ. Күп урында вагончиктар ҙа булдырылмаған. Трактористар ял ваҡыттарын культуралы үткәрә алмайҙар. МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Зарянов трактор бригадаларында булмай, трактористарҙың тормош һәм эш шарттары менән ҡыҙыҡһынмай.

Трактористар араһында социалистик ярыш формаль рәүештә генә ойошторолған. Бөтә эш ярыш договорҙары төҙөү менән генә сикләнгән. Көндәлек эшкә йомғаҡ яһалмай. Стена газетаһы, «боевой листок»тар бер урында ла сығарылмай. Бына шуға күрә лә, Бишбүләк МТС-ының механизаторҙары яңып эшләмәйҙәр һәм Бөтә Союз социалистик ярышҡа ҡушылып алған йөкләмәләрен үтәү өсөн ныҡышмалы рәүештә көрәш алып бармайҙар.

Яр. Вәлиев.

Халк-ара күҙәтеү

Бөтә сит ил матбуғаты Американың СССР-ҙағы посолы Смит һәм В. М. Молотов араһында белдереүҙәр алышыуҙы әлегә тиклем булмаған ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡаршыланы. Хатта Англияла ла, хөкүмәт башында тороусы кешеләр СССР һәм АҠШ араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу мөмкинлеге асылыуы тураһындағы хәбәрҙе асыҡтан-асыҡ дошмандарса баһалауға ҡарамаҫтан, матбуғат ҙур ҡәнәғәтләнеү белдерҙе. Бөтә ҙур газеталарҙың ошо белдереүҙәр алышыуҙың мәғәнәһен бөтөнләй бер төрлө аңлауҙары характерле булып тора.

Американың был турала яҡшы мәғлүмәттәре булған «Нью-Йорк таймс», «Нью-Йорк геральд трибюн» кеүек һәр ваҡыт официаль баһаларҙы ҙур аныҡлыҡ менән ҡабатлаусы газеталары хәҙер ваҡиғаларҙы ике бөйөк державаның регулировать ителмәгән мәсьәләләр буйынса һөйләшеүҙәргә риза булыуы итеп аңланылар.

Ләкин, был мәсьәләлә ул газеталар етерлек дәрәжәлә белмәүсе һәм хатта бер ни тиклем аңлай алмаусы булып күренергә тырышалар. Президент Трумэн һәм государство секретары Маршалл тарафынан яһалған яңы белдереүҙәр, Америка политикаһының үҙгәрешһеҙ ҡалыуы һәм СССР менән АҠШ араһында алып барыласаҡ ике яҡлы һөйләшеүҙәрҙең күҙәтотолмауы тураһында һөйләнәләр. Америка посолы Смиттең акцияһы, Трумэндең һүҙҙәренә ҡарағанда, бары тик «беҙҙең хөкүмәтебеҙҙең позицияһына ҡарата Совет Хөкүмәте фекерендә бер ниндәй ҙә хата аңлауҙар һәм буталсыҡтар булдырмауға» йүнәлтелгән.

Ләкин «аңламау» һәм «буталсыҡ», барынан элек, Америка газеталары редакцияларында күренде. Был айҡанлы ябыҡ пресс-конференциялар булды. Был конференцияларҙа Америка журналистарына яңы установкалар бирелде. Был яңы установкалар хәҙерге ваҡытта Американың политик круттарында күҙәтелә торған буталсыҡлыҡты бөтөрә алмаһылар. Матбуғат быны, АҠШ-тың хакимлек итеүсе круттары СССР-ҙың шул тиклем тәҙ һәм ике мәғәнәһеҙ булған ныҡлы яуап биреүен көтмәүҙәре менән аңлата.

Шулай итеп, бары тик манёвр сифатында ғына иҫәп тотолған дипломатик акция был рамкаларҙан үтеп сыҡты. Ул хәрби шаушыу һәм ҡоралланыуға яңы ассигнованиелар менән тынысһыҙланған илде тынысландырыу бурысын күҙәтә тотто. Ләкин Американың киң общественносеңең ошо ваҡиғаларға булған мөнәсәбәте Америка халҡының ныҡлы конструктив политиканы теләгәнлеген күрһәтте.

«Вашингтон пост» газетаһы, АҠШ хөкүмәтен Советтар Союзы тарафынан ҡуйылған мәсьәләләрҙе тикшереү мөмкинлеген ҡулынан ебәрә, һәм быға «бер ниндәй ҙә аҡланыу булыуы мөмкин түгел», тип билдәләй.

АҠШ-тың прогрессив круттары Уоллес йөҙөндә Америка-Совет мөнәсәбәттәрен яҡшыртыу кәрәклегенең кисектергеһеҙ бурыс икәнлеген билдәләнеләр. Уоллес тарафынан иптәш Сталинға ебәрелгән асыҡ хат АҠШ демократик общественносеңең теләген күрһәтә.

Был ваҡиғаларға яһалған киң откликтар, тыныслыҡ эшен нығытыу перспективалары һөҙөмтәһендә килеп тыуған еңеләйеү, ышаныс тойғолары бөтә илдәрҙәге халыҡ массаларының Советтар Союзы тышҡы политикаһының тыныслыҡ һөйөүсе характерен аңлағанлыҡтары һәм баһалағанлыҡтары, уны тыныслыҡтың иң яҡшы гарантияһы итеп, хаҡлы рәүештә ҡарағанлыҡтары тураһында һөйләй.

* * *

Ошо көндәрҙә «Берләшкән Европа» өсөн хәрәкәт тип атала торған ойошманың Гаагалағы конгресе ябылды. Конгресс алдынан оҙаҡҡа һуҙылған пропаганда кампанияһы алып барылды. Уның бурысы, «көнбайыш цивилизацияны, имеш, уға ҡурҡыныс тыуҙырыусы «коммунистик ҡурҡынычтан» ҡотҡарып ҡалыу һәм һуғыштан һуңғы ауыр экономик ҡыйынлыҡтарҙан сығыу Европа илдәренең суверенитетен бөтөрөүгә һәм «Берләшкән Европа» төҙөүгә ниғеҙләнгән, тип иҫбат итеүҙән торҙо.

Гаага конгресе ниндәй генә ҡабартылған фразалар артына йәшеренмәһен, уның ысын политик маҡсаты Брюссель договоры нигеҙендә төҙөлгән биш государствоның көнбайыш блогын йәнләндерыраҡ киңәйтеүгә ярҙам итеүҙән торҙо. Конгресте ойоштороусылар СССР-ға һәм яңы демократия илдәренә ҡаршы йүнәлтелгән был блокҡа мөмкин тиклем күберәк илдәрҙе, шул иҫәптән Көнбайыш Германияны ла берләштереп ылтыналар. Англияның «Мәнчестер гардиан» газетаһы туранан-тура «Берләшкән Европаны» төҙөү теләгән демонстрациялау булып тороусы Гаага конгресе Брюссель пактын төҙөүсе биш илгә һәм «Маршалл планында» ҡатнашыусы башҡа илдәргә тағы ла энергиялыраҡ итеп йоғонто яһау маҡсатын тота, тип белдерҙе.

Съезд делегаттарының составы үҙе лә шуны раҫлай. Черчилль конгресте рухландырыусы һәм ойоштороусы булып тора. Ул Британия империалистарының вожағы булды һәм шулай булып ҡала ла. Англия, Бельгия, Голландия һәм колониялар билəүсе һәм үҙҙәре тарафынан колонияға төшерелгән илдәрҙә халыҡ-азатлыҡ хәрәкәттәрен баҫыу өсөн бергәләп хәрәкәт итеүҙә ҡыҙыҡһынған башҡа илдәрҙең төрлө реакцион круттарының вәкилдәре уның менән бер компаниелә булып сығыш яһанылар.

Германияны таркатыу пландарын һәм Көнбайыш Германия государствоһын төҙөү, уны көнбайыш блогына индереү пландарын яҡлаусы Германия круттары бары ла шулай булдылар. Аҙаҡ килеп, «конгресте әҙерләүҙә һәм уны үткәреүҙә ул социалистар актив роль уйнанылар. Әле 24 һәм 25 апрелдә ул Парижда Франция, Англия, Италия һәм башҡа Көнбайыш Европа илдәренең социалистик партиялары делегаттарының конференцияһы булғанды. Был конференция Гаагалағы конференцияның ишек асты. Англия лейбористары Гаагаға үҙ группа булып барҙылар, һәм официаль лейбористик етәкселәр, был группа уларҙың теләгенә ҡаршы килеп, эш итте, тип раҫлаһалар ҙа уламалда, был группа етәкселәр яғынан ҡаршылыҡ күрһәтелмәгән ҙә.

Конференцияның политик комитеты резолюцияһы проектын ҡабул итте. Был проектта Көнбайыш Германияны «Федераль Европа» составына индереү кәрәклеге рәүештә талап ителә. Шулай итеп, Гаага конгресе Көнбайыш Германияның государствоһын төҙөүгә һәм ул көнбайыш блокҡа индерелергә тейеш.

Конференция...

Конгресс трибунаһынан Румыния, Польша һәм башҡа яңы демократия илдәренә ҡаршы ходтуҡа асыҡтан-асыҡ саҡырыуҙар. Конгресте ҡатнашыусы күп кешеләр, асылда, ошо һанап үтелгән илдәрҙән ҡасып сыҡҡан эмигранттар менән килештеләр. Был политиканың Көнсығыш Европа илдәренең эске режимдарын үҙгәртергә тейеш, был илдәрҙе «Берләшкән Европа» составына индерергә ынтылыусы булды.

Государстволарҙың суверенитетын һәм бойондороҡһоҙлоғон бөтөрөүҙе ҡаршылыҡ ... конгрестегеләрҙең ... хеҙмәттәшлегендә тыныслыҡҡа һәм экономик үҫешкә ... ҡайһы бер халыҡтарҙың интересларына ... конгрестегеләрҙең ҡарарҙарын ҡаршы ҡыла.

Я. Мазор.

АҠШ һәм СССР хөкүмәттәре араһында белдереүҙәр алышыу тураһында Тэйлор

ВАШИНГТОН, 13 май. (ТАСС). Ҡушма Штаттар вице-президентлегенә өсөнсө партиянан кандидат Тэйлор, уң ҡанат сенаторҙары тарафынан яһалған ҡысҡырыныуҙарға, һыҙғырыуҙарға ҡарамаҫтан, сенатта һөйләгән телмәрендә, СССР һәм АҠШ хөкүмәттәре араһында белдереүҙәр алышыу тураһында Трумэндең яһаған белдереүен ғәйепләне һәм был белдереү менән бөтә донъя халыҡтары риза түгелдәр, тип күрһәтте. 11 май — Смит һәм Молотов араһында ноталар алышыу тураһында иғлан ителгән көн, — тине Тэйлор, — «бөтә донъя халыҡтары өсөн Европала еңеү көнө ваҡытынан һуң булған бөйөк шатлыҡ көнө булып тора».

Тэйлор: Трумэн «Америка халҡының да һәм бөтә донъя халыҡтарының да ышаныстарын шиклəндерҙе» тип белдерҙе һәм президент бөтә донъя ышаныстарына һыуыҡ һыу һипһә лә, ул «ышаныстың утын тулыһынса һүндерә алманы», тип өҫтәне.

Тэйлор үҙенең телмәрендә Европанан алынған бик күп хәбәрҙәр иғлан итте. Был хәбәрҙәрҙә европалыларҙың һуңғы дипломатик ваҡиғаларҙы ҡотлағанлыҡтары тураһында әйтелә.

Шунан һуң ул Америка матбуғатында алып барылған официаль хәрби пропаганданы һәм ялған хәбәрҙәрҙе ғәйепләне. Быға ҡапма-ҡаршы рәүештә ул рус халҡы араһында һуғыш хаҡында бер ниндәй ҙә һүҙҙәр булмауы тураһында Америка хәбәрсеһе Гильмор ҙан 7 апрелдә Мәскәүҙән алынған хәбәрҙе белдерҙе.

Аргентинанан һөрөлгән грек демократтарының яҙмышы тураһында

РИМ, 13 май. (ТАСС). «Унита» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Италия хөкүмәте Аргентинанан һөрөлгән һәм «Тосканелли» пароходында Италияға килтерелгән 31 Греция гражданына ярға төшергә һәм Италия территорияһы аша Югославияға китергә рөхсәт иткән.

Әлегә тиклем Аргентина һәм Италия хөкүмәттәре араһында өлгәшелгән килешеүгә ярашлы рәүештә, Аргентинанан һөрөлгән грек патриоттары Неаполдә бында килгән грек төрмә судноһына алынырға һәм Пирейгә илтелергә тейеш инеләр. Ләкин халыҡ демократик фронты вәкилдәре һәм Италияның дөйөм хеҙмәт конфедерацияһы секретары ди Витторио грек патриоттарын яҡлап был эшкә энергиялы рәүештә тығылғандан һуң де Гаспери хөкүмәте уларҙы грек властарына биреү тураһындағы ҡарарҙы ғәмәлдән сығарырға һәм һәргеңгә ебәрелгән кешеләргә Генуяла ярға төшергә рөхсәт итергә мәжбүр булды.

Һүрәттә: (һулдан уңға): шахмат буйынса донъя чемпионы М. М. Ботвинник һәм донъя беренселеге өсөн матч-турнирҙа икенсе урынды алған йәш шахматист СССР гроссмейстеры В. В. Смыслов.

В. Савостьянов фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

Ботвинник—донъя чемпионы
Совет шахмат мәктәбенең еңеүе

Беҙ гүзәл ваҡиғаның шаһиттәре булдыҡ: бик яуаплы, ҡатнашыусыларҙың күбе бығаса донъя белмәгән, халыҡ-ара турнирҙа беҙҙең илебеҙ вәкилдәре, совет шахмат фекеренең өҫтөнлөгөн күрһәтеп, иң яҡшы урындарҙы алдылар. Беҙҙең замандың иң көслө шахматистары менән ҡаты көрәштә совет инженеры, техник фәндәр кандидаты Михаил Ботвинник беренсе урынды алды. Икенсе урынға йәш москвич, сит телдәр институты студенты Василий Смыслов сыҡты.

Был еңеүҙең ҙур әһәмиәтен аңлау өсөн шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн көрәштәрҙең тарихына ҡарарға мөмкин.

Шахматтың тарихы оҙон. Белгестәр 450 йыл элек шатранж тигән һинд уйыны — шахматҡа әйләнгән тип иҫәпләйҙәр. Европала шахмат 19-сы быуатта ныҡ тарала. Ләкин, бынан 62 йыл элек кенә «Донъя чемпионы» өсөн махсус халыҡ-ара осрашыуҙар башланды.

1886 йыл Стейниц (Прага ҡалаһында тыуған кеше) был маҡтаулы титулды ала. Рус шахмат мәктәбен нигеҙләүсе Чигорин, Россия чемпионы, Стейниц менән ике тапҡыр матчта осраша һәм икеһендә лә «Донъяның беренсе шахматисы» исемен алыуға яҡынлашты. Икенсе матчтан һуң, 1891 йыл Стейниц: «Мин рус шахматисына ҡаршы, башҡа бөйөк мастерҙар менән уйнашлы көрәшкән кеүек, көрәшә алмайым», тине Чигорин тураһында.

Стейниц чемпион исемен 8 йыл буйы йөрөттө. Уны Эммануил Ласкер отоп, чемпион исемен 27 йыл буйы һаҡланы. Гавань ҡалаһында 1921 йылда Ласкер менән йәш Кубалы Хозе Рауль Капабланка араһында ҡыҙыҡ матч булды: 24 партиянан 14-е уйналғандан һуң, Ласкер үҙен еңелгән, тип таныны. Алты йылдан һуң чемпионлыҡты ҡаты көрәшеп Александр Алехин ала. Ә 1935 йылда донъя чемпионлығын Эйве ала, ләкин өс йылдан һуң Алехин үҙ исемен кире ҡайтарҙы. 1946 йылда Алехин үлгәндән һуң беренселек өсөн халыҡ-ара шахмат матч-турнире үткәрергә ҡарар ителде. Оҙаҡ һөйләшеүҙәрҙән һуң был турнирҙы 1948 йылда үткәрергә килештеләр. Был турнирҙың беренсе яртыһы, билдәле булыуынса, Гаагала, икенсе яртыһы Мәскәүҙә үткәрелде.

Башта «иң көслөләр» турнирында 6 кеше: СССР-ҙан өс, АҠШ-тан ике, Голландиянан—бер кеше ҡатнашыуы уйланғайны. Ләкин иң һуңғы көндәрҙә, АҠШ вәкиле Файн, эше күплеккә һылтап, турнирҙа ҡатнашыуҙан баш тартты. 64 шаҡмаҡта «бөйөк һуғыш» башланғас та, СССР-ҙа, шулай уҡ, сит илдәрҙә күп һаны ҡыҙыҡһыныусылар беренсе урынды Михаил Ботвинник алыр тағы һөҙөмтәгә килделәр. Был тәбиғи ҙә: Ботвинник—тәбиғи талант, ғәжәп эшмәкәрле һәм көслө шахматист. Ул 21 турнирҙа (шуның һигеҙе халыҡ-ара, һигеҙе Бөтә Союз турнире) ҡатнашып, 17 тапҡыр беренсе урында, бер тапҡыр икенсе, бер тапҡыр өсөнсө, бары бер тапҡыр ғына 4—5-се урындарҙы бүлешкән кеше.

Быйылғы турнирҙа ла Ботвинник үҙен ғәжәп көслө шахмат көрәшсеһе итеп күрһәтте: 19 турҙа ул 10 партияны отто. Һигеҙҙе бер яҡтың да отмауы менән тамамланы, бары Решевскийға бер партия оттορҙо.

Турнирҙың беренсе яртыһында уҡ Ботвинник ҙур тәьҫир ҡалдырҙы. Шунда уҡ Европа матбуғатында уны: «Донъяның буласаҡ чемпионы», «өс рус шахматисының иң яҡшыһы», «бөйөк һөйкәл», тип атанылар.

Комсомол члены Василий Смыслов — турнирҙа ҡатнашыусыларҙың иң йәше. Яҡшы уңыштары булһа ла, уның «йомшаҡ» яҡтары ла бар. Бәрәүҙәр: «Ул беренсе отроуҙан һуң уҡ спорт формаһын юғалта, үҙ мөмкинлектәренән түбән уйнай башлай», икенселәр: «Смысловтың халыҡ-ара шахмат тәжрибәләре юҡ» һәм башҡалар, тинеләр. Ләкин Смыслов уйыны менән ышанмаусыларҙың иҫәптәрен юҡҡа сығарҙы. Турнирҙың уртаһында уҡ С. Решевский:

— Йәш Смысловтың уйыны мине өсөн бүләк булды. Ул элек шахмат донъяһына билдәле ине, ләкин матч-турнирҙа тағы ла күргәнерәк оҫталыҡ күрһәтте. Мин үҙ партияларым буйынса ғына фекер итмәйем, ул Ботвинник менән осрашыуҙарҙа ла маҡтаулы һөҙөмтәләргә ирешә, — тип иғлан итте.

АҠШ чемпионы С. Решевский донъя шахматистарының көслөләре сафына инә. Ул Бостон ҡалаһында бухгалтер-ревизор булып эшләй. Ул чемпионатҡа әҙерләнеү өсөн бары үҙ иҫәбенә бер айлыҡ отпуска алған. Билдәле, был аҙ әҙерлек уның уйын һөҙөмтәләрендә үҙен һиҙҙерҙе.

Макс Эйве—турнирҙа элек «иң яҡшы донъя шахматисы» исемен йөрөткән берҙән-бер кеше ине. Бында ул уңышһыҙлыҡҡа осраны. Матч-турнирҙың баш судьяһы Югославия профессоры М. Видмар былай тине:

— Минең ышаныуымса, хәҙер донъя сәхнәһендә уйындың совет стиле хакимлек итә. Уның үҙенсәлеге, — көсөркәнешлеккә, тынлы көрәшкә, һөжүмгә ынтылыу. Элекке шахмат фекере корифейҙарын хәҙергеләр менән сағыштырыу мөмкин түгел. Хәҙер совет стиле сағыштырмаслыҡ үҫтерелә.

Совет шахматистарының еңеүе Ватанға ҙур бүләк. П. Смол.

Культура хроникаһы

Маҡар районы Сәлих ауылы библиотекаһы өс күсмә библиотека ойошторҙо. Улар баҫыуҙа эшләүсе колхозсыларҙы хеҙмәтләндерәләр.

* * *

Яҙғы сәсеү уңайы менән Йәрмәкәй МТС-ы эргәһендә культбригада ойошторолдо. Ул МТС эшселәре өсөн ҙур концерт бирҙе.

* * *

Ошо көндәрҙә Өфө район Советы исполкомы культура-ағартыу учреждениелары работниктарының семинарын үткәрҙе. Семинарҙа ҡатнашыусылар яҙғы сәсеү осоронда культура-ағартыу учреждениеларының бурыстары тураһында доклад тыңланылар, фекер алыштылар һәм яҙғы сәсеүҙә хеҙмәтләндереү пландарын тикшерҙеләр.

* * *

Бөрө районында ике меңдән артыҡ радиоточка бар. Урындағы радио селтәре аша тапшырыуҙар ойошторола, ауыл хужалығы, культура фронты алдынғылары, Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, уҡыу отличниктары, совет, комсомол, профсоюз, колхоз һәм МТС етәкселәре микрофон алдында сығыш яһайҙар.

Күптән түгел ВКП(б)-ның район комитеты үҙенең бюроһында урындағы радиотапшырыуҙар һәм колхоздарҙы радиолаштырыу мәсьәләһен тыңланы һәм яҙғы сәсеү осоронда радиотапшырыуҙарҙың бурыстарын билдәләне.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Беҙҙең республикала

Колхоздар өсөн молотилкалар

Башҡорт АССР-ы урындағы промышленносҡа ҡараған Өфө механик заводы быйыл колхоздар өсөн ҡатмарлы молотилкалар етештереүҙе үҙләштерҙе. Хәҙер 30 молотилка эшләп сығарылды ла инде.

Был молотилканы эшләүҙе үҙләштереү уңайы менән заводтың механика цехы байтаҡ уҡ киңәйтелде. Уны эшләү өсөн кәрәк булған детальдар хәҙер заводтың цехтарында етештерелә. Йыл аҙағына тиклем бөтәһе 300 молотилка эшләп сығарыласаҡ.

Шулай уҡ заводта ашлыҡ елгәргес машиналарын һәм тимер тырмаларҙы күпләп эшләп сығарыу өсөн әҙерлек алып барыла. Быны өсөн кәрәкле булған йыһаҙлар булдырылды.

Быйыл завод колхоздарға бер мең елгәргес машина ебәреүҙе бурыс итеп ҡуйҙы. Хәҙер ул 500 елгәргес машинаны колхоздарға ебәреү өсөн Башсельхозснабҡа тапшырҙы.

Пландан тыш 800 мең квадрат дециметр күн

Өфөләге икенсе номерлы күн заводы коллективы Еңеү көнө байрамын биш айлыҡ программаны арттырып үтәү менән ҡаршыланы. Ошо ваҡыт эсендә пландан тыш 800 мең квадрат дециметр хром күн тауарҙары эшләп сығарҙы. Был 20 мең пар туфля эшләргә етә, тигән һүҙ.

Ошо йылдың дүрт айы эсендә, үҙгән йылдың ошо ваҡытына сағыштырғанда, хеҙмәт етештереүсәнлеге 80 процентҡа артты, продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 23 процентҡа кәмене.

Завод коллективы йыл аҙағына тиклем пландан тыш бер миллион квадрат дециметр хром күн эшләп сығарырға йөкләмә алды.

Шефлыҡ ярҙамы

Республикан библиотека үҙе шефлыҡ иткән райондарын, колхоздарын, совхоздарын һәм МТС-тарын яҙғы баҫыу эштәре осоронда хеҙмәтләндереү өсөн күсмә библиотекалар ойошторҙо.

Баҫыу эштәре осоронда район библиотекаларына практик ярҙам күрһәтеү өсөн республикан библиотеканың байтаҡ ҡына работниктары райондарға киттеләр.

Бынан башҡа библиотеканың уҡыу залында «яҙғы сәсеү» тигән темаға фотокүргәҙмә ойошторолған. Бөтә район библиотекаларына ла ауыл хужалығы буйынса булған әҙәби материалдарҙы райондарҙың үҙенсәлектәренә ҡарата ҡулланыуҙы күрһәткән әҙәби китаптар исемлеге һәм методик ҡулланмалар ебәрелде.

Эшселәр рационализаторлыҡ тәҡдимдәр индерәләр

Өфө паровоздар ремонтлау заводының техник бүлегенә ағымдағы йылдың дүрт айы эсендә генә уйлап сығарыу һәм рационализация буйынса эшселәрҙән 86 тәҡдим индерелде. Ошо тәҡдимдәрҙе тормошҡа ашырыу һөҙөмтәһендә завод йылына 128.387 һум экономия аласаҡ.

Инженер иптәш Ефстифеевтең «ФД» серияһындағы паровоздарға ремонт үткәреү буйынса индергән тик бер тәҡдиме генә заводҡа йылына 23.128 һум экономия бирә.

Һуған ултыртыу башланды

Өфө районының һуған үҫтереүсе колхоздары һуған ултырта башланылар. «Новая деревня» һәм Калинин исемендәге ауыл хужалығы артелдәре бер гектар һуған сәстеләр ҙә инде.

Шулай уҡ Иглин районы колхоздары ла һуған сәсеү эшенә тотондолар.

Республика колхоздары быйыл был ҡиммәтле культура сәсеүлектәрен тағы ла байтаҡ арттырасаҡтар.

Суд работниктарының өлкә кәңәшмәһе

Ошо көндәрҙә Башҡортостан суд работниктарының өлкә кәңәшмәһе булып үтте. Суд һәм юстиция эштәрен артабан яҡшыртыу бурыстары тураһында Башҡорт АССР-ы Юстиция Министры иптәш Авзянов доклад яһаны.

— Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәштә, — тине докладсы, — халыҡ судтарының яуаплылығы тағы ла арта, һәм ул, алда торған бурыстарҙы тормошҡа ашырыу өсөн суд, юстиция работниктарын социалистик һәм общественный милекте һаҡлауҙа һиҙгер булырға, растрата яһаусыларға, төрлө урлашыуҙарға, производствола һәм учреждениеларҙа хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларға ҡаршы аяуһыҙ көрәш алып барырға саҡырҙы.

Доклад буйынса 18 кеше сығыш яһаны. Улар суд һәм юстиция эшендә булған ҡайһы бер уңыштарҙы билдәләү менән бергә, әлегә тиклем йәшәп килгән етди етешһеҙлектәрҙе, айырым фактыларға нигеҙләп, ҡаты тәнҡитләнеләр һәм был кәмселектәрҙе тиҙерәк бөтөрөү сараларын билдәләнеләр.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—73-26.

П 01798. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Х.—1. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

19-сы йыл сығыу

1948 йыл № 98 18 май шишәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Баҫыу эштәренең графигы — беҙҙең өсөн закон. Уның көндән-көн үтәлеүенә һәм арттырылып үтәлеүенә ирешергә кәрәк. (1-се бит).
АГИТАТОРҘАРҒА ЯРҘАМҒА. П. Лобанов.—Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылында СССР-ҙың ауыл хужалығы. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Яр. Валиев. — Хата юлынан бирегуе бер ҡарар тураһында. (2-се бит).
С. Маулютов, М. Каримов. — Производствоны ойоштороусылар. (2-се бит).
Социалистик ярышта алдынғыларға тиңләшергә! Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективе иптәш Сталинға биргән вәғәҙәһен уңышлы үтәй. (3-сө бит).
ЭКЗАМЕНДАР АЛДЫНАН. (3-сө бит).
Х. Камалов. — Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына ҡуанһыҙ ҡарашты бөтөрергә. (3-сө бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. С. Умов. — Көнбағышты силос өсөн иҫсек сәсергә. (4-се бит).
Р. Николаев. — Башҡортостанда бересклет. (4-се бит).
Е. Кучеров. — Иәш бакссасылар конкурсы дауам итә. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн көрәш — ауыл партия ойошмаларының үҙәк бурысы

Башҡортостан игенселәре ауыл хужалығын тағы ла күтәреүҙәрәк күтәреү өсөн Бөтә Союз социалистик ярышына ҡушылыу тураһындағы бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хаттары менән тәбиғи зур политик әһәмиәткә эйә булған йөкләмәләр алдылар. Государствобыҙҙың ҡеүәтен артабан нығытыу, хеҙмәтсәндәрҙең матди шарттарын бик ҡыҫҡа срокта яҡшыртыу өсөн республикабыҙҙа иген һәм башҡа ауыл хужалыҡ культураларынан юғары уңыш алыу тураһындағы был патриотик йөкләмәләрҙе үтәү — өлкә партия ойошмаларының иң мөһим бурысы булып тора. Был социалистик йөкләмәне уңышлы үтәү өсөн бынан бөтә шарттар ҙа бар. Тракторҙар һәм яҙғы сәсеү өсөн кәрәкле булған ауыл хужалығы машиналары ремонтлау эше ваҡытында тамамланды. Партия һәм хөкүмәт беҙгә бик күп ярҙам итә, күп тракторҙар, ауыл хужалығы машиналары һәм колхоздарыбыҙға бирә.

Большевиктар партияһының, Совет хөкүмәтенең һәм иптәш Сталиндың ауыл хужалығы һәм колхоз крәҫтиәндәре тураһындағы был хәстәрлеге республикабыҙҙың игенселәрендә һәм бөтә ауыл хужалығы работниктарында был эшкә тағы ла ҙурыраҡ күтәренкелек тыуҙыра. Партия ойошмалары хеҙмәтсәндәрҙең был политик күтәренкелеген яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үтәүгә йүнәлтергә тейештәр.

Яҙғы сәсеү ваҡытында партия ойошмаларының политик эш алып барыуы бөтә хужалыҡ эштәренең нигеҙе булып тора. Мәҫәлән, Баҡалы районының «Урожай» колхозындағы партия ойошмаһы (секретаре иптәш Иманов) коммунистары яҙғы баҫыу эштәренең иң ауыр участкаларына беркетте. Эш урындарында агитаторҙар эшләй. Был колхоз иң алдынғылар рәтендә бара.

Фактылар колхозсылар массаһының яңы инициативаһын күтәреп, дөрөҫ етәкселек иткән һәм йыһанланып эшләгән ойошмаларҙың эше уңышлы барыуын күрһәтә. Әммә партия ойошмаларының бөтәһе лә был эштә тейешенсә эшләмәйҙәр. Был хужалыҡ эштәренә партия ойошмалары хата политик йүнәлеш бирмәй, ойошмаларҙың партия тормошо етәкселек итеүҙә хата юлдан китеүе менән аңлатыла. Сәҡмағош районының ҡайһы бер партия ойошмалары был эштә ярҙам күрһәтмәйҙәр. Партия етәкселеге хужалыҡ органдары эшенә оператив рәүештә ҡыҫылыу урынына, индивидуаль эштәрҙе генә эшләп йөрөйҙәр. Бик күп тәүге партия ойошмаларында коммунистар яҙғы сәсеү эштәренән ситтә торалар. «Боевик» колхозындағы 18 коммунистең 6-һы ғына баҫыу эшендә ҡатнаша. Уларҙың да күбеһе хатта хеҙмәт көнө минимумын да үтәмәй. Ҡалғандары правлениеһендә төрлө административ эшкә урынлашҡандар. Коммунистар колхоз производствоһында шәхси эш өлгөһө күрһәтмәгән кеүек үк, агитацион массовый эш тә алып бармайҙар. Был, Сәҡмағошта партия өлкә конференцияһының

аныҡ һәм конкрет күрһәтмәләренән тейешле һығымта яһалмағанлығын күрһәтә. Шуға күрә лә, Сәҡмағош районының яҙғы сәсеүҙә күрһәткестәре Баҡалы һәм Туймазы райондарынан бик күп артта ҡалыу осраҡлы хәл түгел.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты партия ойошмаларының хужалыҡҡа етәкселек итеүҙәге иҫке, зарарлы метод — административ эш ысулын бөтөрергә, политик юнәлеш бирергә, массовый-политик эш алып барыу һәм үтәлеште тикшереүҙе нығытыу кәрәклеге тураһында бик күп күрһәтмәләр бирҙе. Ләкин Бишбүләк, Салауат һәм Дыуан райондарының партия ойошмалары үҙҙәренең колхоздарға етәкселек итеү методтарын үҙгәртмәйҙәр. Ул ғына ла түгел, ВКП(б)-ның Бишбүләк район комитеты бюроһы Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһының секретаре иптәш Игнатьевтың районның партия етәкселегендәге урын үтеп, яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта үткәрергә ҡушҡа. Райкомдың был ҡарарынан һуң иптәш Игнатьев партия-политик эштәрҙе бөтөнләй онотоп, бригадирҙарҙы яңақ бирә, тарты тектәүсе бөлеү кеүек эштәрҙә лә ҡулына алмайса тиклем барып етә.

Иптәш Сталин беҙҙә былай тип өйрәтә: «Политикаһыҙ хужалыҡтан айырырға ярамай. Беҙ политиканан ситтә китә алмаған кеүек, хужалыҡтан да ситкә китә алмайбыҙ... Улар берге баштан бер-береһе бәрәкәт итәләр, һәм кем дә булһа беҙҙең практик эшебеҙҙә хужалыҡты политиканан айырырға, политик эште кәметеү иҫәбенә хужалыҡ эшен көсәйтергә юлға, киреһенсә, хужалыҡ эшен кәметеү иҫәбенә политик эште көсәйтергә тырыша, үҙ-үҙен иҫәпһеҙ беләүгә барып терәлә».

Хәҙер партия ойошмалары яҙғы сәсеүҙең темпын көсәйтеү өсөн партия-политик эште бөтөнләй көн талаптарына кимәлдә күтәрергә тейештәр. Һәр яҙғы урожай өсөн көрәштә тәжрибәле Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының, ордендар һәм миҙалдар менән наградланған социалистик баҫыу алдынғыларының эш тәжрибәләрен популярлаштырыу юлы менән колхозсыларҙы бик тиҙ сәсеүгә мобилизацияларға кәрәк. Колхоздар, ауыл хужалығында эш тәжрибәһе йыйыу, МТС-тар эше һаҡындағы доклад менән һөйләшеүҙәр уҙғарыу. Колхоздарҙа, МТС-тарҙа һәм һәр бер агитколлективтарҙа һәм һәр бер агитатор колхоздарҙың ойошмалары агитатор һәм пропагандистар менән бергә, баҫыу ихтыяжы райондарында һәм колхоздарҙың хеҙмәт эштәрен күрһәтеү менән бәйләп эшләргә тейештәр. Колхоз кинолары, стена газеталары, «боевой листок»тар, «молния»лар, заявкалар ойошторолорға тейеш.

Яҙғы сәсеү ваҡытында партия ойошмаларының һәм коммунистарҙың ойоштороу-политик эштәре арттырылырға тейеш, коммунистарҙың тракторҙарға, сәсеүселәргә һәм һабанда эшләүселәргә үҙ өлгөләре күрһәтеүҙәре менән бөтә колхозсыларҙы һәм тракторсыларҙы яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреү өсөн көрәшкә туплаярға кәрәк. Яҙғы сәсеү эштәренең һуңлап башланыуы хәҙер партия ойошмаларынан көсәйтелгән эш талап итә. Сәсеүҙең уңышлы үтәлеүе партия-политик эштәрҙе киң йәйелдереүгә, хужалыҡ эштәренә дөрөҫ етәкселек итеүгә бәйләнгән. Был бурыстарҙы уңышлы үтәү һәр бер тәүге партия ойошмаһының һәм һәр бер коммунистең үҙәк бурысы һәм намыҫ эше ул.

Юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү ҡағиҙәләре

СССР-ҙың юғары белем Министерствоһы 1948—49 уҡыу йылы өсөн юғары уҡыу йорттарына ҡабул итеү ҡағиҙәләрен раҫланы.

Юғары уҡыу йорттарына инеүселәр, уҡыу йортоноң специальноҫена ҡарап, ҡабул итеү экзамендәре үтәләр. Ә университеттарға инеүселәр сит телдәрҙең береһенән — инглиз, француз, йәки немец теленән экзамен бирәләр. Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдәр алып тамамлаусылар юғары уҡыу йорттарына, үткән йылдарҙағы кеүек үк, экзаменһеҙ ҡабул ителәләр.

Юғары уҡыу йорттарына инеү тураһындағы ғаризалар 20 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителәләр. Ҡабул итеү экзамендәре 1 августан 20 августа тиклем үткәрелә.

(ТАСС).

Баҫыу эштәренең графигы — беҙҙең өсөн закон. Уның көндән-көн үтәлеүенә һәм арттырылып үтәлеүенә ирешергә кәрәк

Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне тулыһынса үтәү өсөн

«Шәмнәк» совхозы работниктәре (директоры иптәш Брочников, партия ойошмаһы секретаре иптәш Пушкарев) Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрен тулыһынса үтәү өсөн баҫыуҙа ҙур дәрт менән эшләйҙәр.

Совхоз иртә культуралар сәсеүҙе 6 эш көнөндә тамамланы. Бөтәһе 1417 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары сәселде. Шуның 1250 гектары тунға һөрөлгән ергә үткәрелде.

Совхоз коллективы был уңышҡа тракторҙар паркын эштә тулы файҙаланыу һөҙөмтәһендә ирешә. 16 трактор тәүлек әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ эшләне. Бынан башҡа баҫыу эштәрендә 50 баш эш аты файҙаланылды. Тракторсыларҙан Глоков, Натаев иптәштәр сәсеүҙә айырыуса яҡшы эшләнеләр, көндәлек эш нормаларын икеләтә арттырып үтәнеләр. Сәсеүселәрҙән Федоров һәм Ханнанов иптәштәр сәскестәр менән көн һайын 29 — 30-ар гектар ашлыҡ сәстеләр.

Хәҙер һуңғы культуралар сәсеү һәм бер үк ваҡытта пар һөрөү эштәре башланды. Тәүге ике көндә 50 гектар пар һөрөлдө.

Н. Николаев,
Х. Терегулов.

Иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар

ДӘҮЛӘКӘН. «Башҡортостан» колхозы 11 майға 150 гектар бойҙай, 50 гектар һоло, 28 гектар арпа, 50 гектар көнбағыш сәсеп, иртә культуралар сәсеү планын үтәне. Бында хәҙер колхозсылар һуңғы культураларҙы сәсеүҙе 20 майға тамамлау өсөн көрәшәләр.

Районда «Колос», «Ҡыҙыл тормош», «Ҡыҙыл Урал», «Яңы тормош» колхоздары ла иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар.

Р. Суфиянов.

Пландан тыш

БОРАЙ. (Телефон аша). Районда беренсе булып «Металл», «Сулпан» колхоздары иртә культуралар сәсеүҙе тамамланылар. Сәсеү 5 көн эсендә үткәрелде.

Хәҙер был колхоздар пландан тыш ашлыҡ сәсәләр.

ҠУЙБЫШЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ КОЛХОЗ 20 ГЕКТАР ПАР ҺӨРҘӨ

БАЛТАЧ. (Телефон аша). Ҡуйбышев исемендәге колхоз иртә культуралар сәсеү планын ҡыҫҡа сроктарҙа арттырып үтәүгә өлгәште. 497 гектар урынына, 500 гектарҙан артыҡ бөртөклө ашлыҡ культуралары сәселде.

Хәҙер бөтә көс һуңғы культуралар сәсеүгә һәм пар һөрөүгә тупланды. 20 гектарҙан артыҡ пар һөрөлдө лә инде.

Өфө районының «Берҙәм» колхозы баҫыуҙарында көндөҙ ҙә, төндә лә ҡыҙыу эш бара. Был колхозда эшләүсе трактористка иптәш Р. М. Макаримова смена нормаһын һәр ваҡыт арттырып үтәй.

Һүрәттә: Тунға һөрөлгән ергә культивация үткәрелә, Овалда — трактористка иптәш Р. М. Макаримова. Е. Пряжевский фотоһы.

Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 15 майына, проценттарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән	Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән
1.	Туймазы	58,1	46	33.	Дыуан	33,5	33
2.	Балтач	49,2	31	34.	Архангель	33,0	20
3.	Яңауыл	49,1	27	35.	Белоҡатай	33,0	30
4.	Ҡандра	47,9	33	36.	Иглин	33,0	25
5.	Баҡалы	47,2	29	37.	Федоровка	32,5	20
6.	Салауат	46,8	43	38.	Йәрмәкәй	32,2	23
7.	Белорет	46,3	57	39.	Матрай	32,1	30
8.	Дәүләкән	45,1	33	40.	Благовещен	31,8	23
9.	Бүҙәк	41,6	26	41.	Сәҡмағош	31,8	24
10	Борай	41,1	30	42.	Баймаҡ	31,5	42
11.	Әлшәй	41,0	29	43.	Ҡалтасы	31,4	22
12.	Әбйәлил	40,0	39	44.	Бишбүләк	31,0	21
13.	Стәрлетамаҡ	39,6	30	45.	Байҡыбаш	30,4	31
14.	Покровка	39,0	32	46.	Мәсетле	30,4	30
15.	Кушнаренко	38,9	23	47.	Бөҙәнә	30,3	29
16.	Бөрө	37,9	28	48.	Ҡырмыҫҡалы	30,2	10
17.	Аҫҡын	37,8	26	49.	Учалы	30,2	53
18.	Миәкә	37,8	24	50.	Ҡариҙел	30,1	23
19.	Маҡар	37,8	28	51.	Мәләүез	30,0	20
20.	Өфө	36,7	30	52.	Оло-Тиләк	29,6	23
21.	Ҡыйғы	36,4	52	53.	Көйөргәҙе	29,0	21
22.	Благовар	36,2	19	54.	Нуриман	29,0	22
23.	Шаран	36,2	21	55.	Ауырғазы	27,5	19
24.	Шишмә	35,5	27	56.	Күгәрсен	26,7	21
25.	Татешле	35,4	27	57.	Зиянчура	26,5	19
26.	Йомағужа	35,4	23	58.	Хәйбулла	25,1	26
27.	Илеш	35,2	30	59.	Бәләбәй	24,5	27
28.	Ғафури	34,4	23	60.	Воскресен	23,3	19
29.	Стәрлебаш	34,4	27	61.	Абзан	22,1	19
30.	Дүртөйлө	34,3	27	62.	Йылайыр	15,5	19
31.	Миәкә	34,1	28	63.	Бөрйән	12,6	9
32.	Краснокам	33,8	27				

* * *

Май айының өсөнсө биш көнлөгөндә Туймазы, Балтач, Яңауыл районы колхоздары яҙғы сәсеүҙә яҡшы ғына үсеш бирҙеләр. Ләкин республикабыҙҙың күпселек райондарында сәсеү элеккесә түбән темп менән бара. Айырыуса Воскресен, Бәләбәй, Абзан райондары артта ҡалалар. Улар биш көн эсендә ни бары 16—19 процент кенә үсеш биреү менән сикләнделәр.

Урал аръяғы райондарында ла баҫыу эштәренең темпы тәфү ителмәҫлек түбән. Йылайыр, Хәйбулла, Баймаҡ һәм Учалы райондарында биш көнлөк үсеш 14—17 проценттан артмай.

Өсөнсө биш көнлөктә сәсеү тик тунға һөрөлгән ерҙәр иҫәбенә генә алып барылды. Яҙғы һөрөүгә иғтибар бирелмәй. Шуның һөҙөмтәһендә республика колхоздарында үткән йылдың шул ваҡытына ҡарағанда яҙғы һөрөү 99 мең гектарға кәмерәк үткәрелде. Зиянчура, Миәкә райондары өсөнсө биш көнлөктә һөрөү планын ни бары 9 процентҡа үтәнеләр.

Сәсеүҙең артабанғы темпы тулыһы менән һөрөү эшенең барышына бәйләнгән. Ҡоро килгән яҙҙа ерҙе һуңлап һөрөү дымды бик күп юғалтыуға килтерә. Шулай булғас, һөрөү эшенә айырыуса иғтибар бирелергә тейеш. Бөтә райондарҙа ла һөрөү темпын икеләтә, артта ҡалған райондарҙа өсләтә арттырырға кәрәк.

15 майға яҙғы бойҙай сәсеү планын республика колхоздары ни бары 56,3 процентҡа ғына үтәнеләр. Был күрһәткес һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Иртә сроктарҙы талап иткән был культураны сәсеү планын 76—89 процентҡа үтәгән Туймазы, Баҡалы, Яңауыл, Белорет райондары ғына бер ни тиклем ҡәнәғәтләнерлек эшләнеләр. Ә Абзан, Хәйбулла, Йылайыр, Матрай, Күгәрсен, Баймаҡ, Йәрмәкәй, Көйөргәҙе, Федоровка райондары яҙғы бойҙай сәсеү планының яртыһын да үтәмәгәндәр.

Майлы һәм ҡуҙаҡлы культуралар сәсеү пландары ла үтәлеүҙән алыҫ. Күп кенә урындарҙа был культуралар сәсеүҙе (бигерәк тә рыжик, горчица, мәк культураларын) баһаламау йәшәп килә. Уларҙы сәсә башламаған райондар ҙа әле күп кенә. Шулай уҡ шәкәр сөгөлдөрө лә бик аҡрын сәселә.

Республикала күп йыллыҡ үләндәр сәсеү менән хәл айырыуса тревогалы. Йәрмәкәй, Иглин, Краснокам, Бөҙәнә райондары әле бер генә гектар ҙа үлән сәсмәгәндәр. 2-шәр һәм 3-әр мең гектар үлән сәсергә тейеш булған Бәләбәй, Федоровка райондары шул көнгә тиклем ни бары 3-әр гектар ғына сәстеләр.

Майҙың дүртенсе биш көнөндә сәсеү темпын ҡырҡа күтәреү һәм 1—2 көн эсендә яҙғы бойҙай сәсеүҙе тамамлау талап ителә. Шулай уҡ бөтә саралар менән борсаҡ, көнбағыш, шәкәр сөгөлдөрө һәм күп йыллыҡ үләндәр сәсеүҙе лә бик ныҡ тиҙләтергә кәрәк.

Алдынғы колхоз

ШИШМӘ. (Телефон аша). Буденный исемендәге колхоз Шишмә районында беренсе булып баҫыу эштәренә башлағайны. Колхозсылар иртә культуралар сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн һәр бер көндө һәм сәғәтте эштә тулы файҙаландылар.

Колхоздың алдынғы звеноводы, ВКП(б) члены иптәш Киреев колхозсылар араһында социалистик ярышты ойоштороуҙың инициаторы булды. Ул быйыл үҙенә беркетелгән участкала бойҙайҙың һәр бер гектарынан кәмендә 25-әр центнер урожай алырға һүҙ биреп, бөтә звеноводтарҙы ярышҡа саҡырҙы. Был звено үҙ участкаһында иртә культуралар сәсеүҙе беренсе булып тамамланы. Бойҙай культураһы бары тик яҡшы эшкәртелгән ергә генә сәселде. Звеноның бөтә членлары ла эш нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Колхоз бөтәһе 200 гектар бойҙай, 95 гектар һоло һәм 80 гектар башҡа культуралар сәсте. Хәҙер бөтә көс һуңғы культуралар өсөн тупраҡ әҙерләүгә тупланды.

Ә. Ардеев.

Мәләүез һаман аҡрын һәм насар сәсә

МӘЛӘҮЕЗ. (Махсус хәбәрсебеҙҙән). Районның Тимошенко исемендәге колхозында (председателе иптәш Ткаченко) 12 майға ни бары бер гектар ер һөрөлдө. Председателе иптәш Резин булған «Тамьян» колхозы, МТС тарафынан хеҙмәтләндерелеүенә ҡарамаҫтан, яҙғы сәсеү планын әле ни бары 2 процентҡа ғына үтәне. Районда хатта сәсеү эшенә башламаған колхоздар ҙа бар.

Район буйынса 32 мең гектар һабан ашлығы сәселергә тейеш. 12 майға уның үтәлеше ни бары 15 процент тәшкил итә. Көнөнә ни бары 700—800 гектар ғына ашлыҡ сәселә.

— Яҙғы көн — йыл туйҙыра!

Был урынлы һәм дөрөҫ мәҡәл. Ләкин Мәләүез районының етәкселәре быны онотала. Ҡиммәтле ваҡыт тулы файҙаланылмай, темп һаман түбән көйөнсә ҡала бирә. Быларҙың төп сәбәбе колхоздарҙа хеҙмәттең насар ойошторолоуында, трактор бригадаларының тулы нагрузка менән эшләмәүҙәрендә.

Юғарыла иҫкә алынған Тимошенко исемендәге колхозда 3 звено иҫәпләнә. Ләкин улар ҡағыҙҙа ғына йәшәйҙәр. Сәсеүҙең беренсе көндәрендә үк индивидуаль сдельщинаны ҡулланыуға, звеноларҙы нығытыуға иғтибар бирелмәне. Баҫыуҙа эштәр тарҡау бара. Колхоз етәкселәре баҫыу эштәрен ойоштороу урынына, индивидуаль баҡсала эшләү менән мауығып, төп бурыстан ситкә китәләр.

«Смычка» колхозында (председателе иптәш Петров) звеноларға етәкселәр ҙә билдәләнмәгән. Колхозсылар баҫыу эшенә теләһәләр сығалар, теләмәһәләр юҡ. Тиҫтәләгән колхоз члены минимум хеҙмәт көнө лә эшләмәгән. Ләкин колхоз правлениеһе улар тураһында бер төрлө лә конкрет сара күрмәй.

«Красный Октябрь» колхозында ла сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн көрәшмәйҙәр. Колхоз председателе иптәш Худяков үҙе үк звеноларҙың тарҡалыуына юл ҡуя, звено членлары инсек тура килде шулай эшкә ҡушыла. Сәсеүҙә агротехника ҡағиҙәләре үтәлмәй. Үҙған йыл көҙҙән бик насар һөрөп ҡалдырылған ерҙе яҙ көнө лә яҡшылап эшкәртмәйҙәр. Ашлыҡ ҡул менән сәселә. Арҡылы тырматылаһы урынға, ер буйға ғына тырматыла. Һөҙөмтәлә орлоҡтоң 20—30 проценте күмелмәй ер өҫтөндә ҡала. «Сарлаҡ» колхозында иһә бойҙайҙы бөтөнләй тырматылмаған ергә сәсәләр. Шуныһы ғәжәп, бында Мәләүез МТС-ы агрономы иптәш Гнездилов та була. Ләкин ул сифатһыҙ эшкә килешеп ҡарай.

Райондағы МТС-тарҙағы трактор паркы ла яҙғы сәсеүҙә әҙерлекһеҙ башланы. 3 МТС-тағы 130 тракторҙың өстән бер өлөшө төрлө сәбәптәр менән бөгөнгә тиклем сәсеүҙә ҡатнашмай. Һуҡайлы МТС-ында заправка инвентарҙары етешмәй. Трасин исемендәге колхозға яғыулыҡ ташыуға бары бер мискә бүленгән. Ә яғыулыҡ 25 километрҙан килтерелә һәм уның ваҡытында килеп өлгөрмәүе арҡаһында тракторҙар йыш ҡына тик торалар.

Күп кенә урында тракторҙар яҡтылыҡ менән тәьмин ителмәгәндәр. Мәләүез МТС-ында 22 тракторҙа фара юҡ. Һөҙөмтәлә улар төндә эшләй алмайҙар, нормалар үтәлмәй.

Яҙғы сәсеү эшендәге бындай етешһеҙлектәр серьез тревога тыуҙыралар. Ә район ойошмалары тарафынан колхоздарҙа, трактор бригадаларында хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу һәм сәсеү темпын күтәреү буйынса күрелгән саралар һис тә етерлек түгел әле.

Б. Сафин.

Агитаторҙарға ярҙамға

Һуғыштан һуңғы биш йыллыктың өсөнсө йылында СССР-ҙың ауыл хужалығы

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының тарихи карарҙары нигеҙендә ауыл хужалығын үҫтереүҙә тарап һынылыш яһауға өлгәшелде. 1947 йылда ауыл хужалығының валовой продукцияһы, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 32 процентка, игенселек продукцияһы 48 процентка үҫте. Бөртөклө ашлыҡ культуралары урожайының һуғышка тиклемге кимәленә өлгәшелде. Государствобыҙ 1947 йылда һуғышка тиклемге иң яҡшы йылдарҙа алған саҡлы иген алды.

1948 йыл урожайы өсөн арыш һәм көҙгө бойҙай сәсеү планы арттырып үтәлде: ужым, 1946 йылға карағанда, 3,5 миллион гектарға артык сәселде. Туңға һөрөү, 1946 йылға карағанда, 8 миллион гектарға артык үткәрелде. Колхоздарҙа бөтә төр малдарҙың һаны артты.

Машина-трактор станциялары ауыл хужалығын күтәреүҙә ҙур роль уйнанылар. 1947 йылда улар трактор эштәрен, 1946 йылға карағанда, 29 процентка артыҡ эшләнеләр. Һәр бер тракторға эшләп сығарыу һуғышка тиклемге кимәленән артып китте.

1947 йылда өлгәшелгән уңыштар ауыл хужалығын аяҡка баҫтырыу һәм үҫтереү өсөн большевиктар партияһы тарафынан ойошторолған бөтә халыҡ хәрәкәтенең туранан-тура һөҙөмтәһе булып торалар. Миллионлаған колхозсылар, совхоз һәм МТС работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре халыҡтарҙың юлбашсыһы бөйөк Сталинға яҙған хаттарында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы карарын тормошка ашырырға һүҙ бирҙеләр. Был йөкләмәләр уңышлы үтәләләр. Ауыл хужалығы алдынғылары гүзәл уңыштарға өлгәштеләр. Уларҙың күбеһенә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Меңәрләгән ауыл хужалығы эшсәндәре СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградландылар.

Совет халҡының ауыл хужалығын үҫтереүҙәге уңыштары менән ғорурланырға бөтә нигеҙлектәре бар. Был ғорурлыҡтың хуш күңеллелек һәм үҙ-үҙеңде тынысландырыу менән уртаҡ бер ҡамыһе лә юҡ. Күп кенә ауыл хужалығы органдарының, МТС һәм колхоздарҙың эшендә булған сериоз етешһеҙлектәр турағында оноторға ярамай. Был етешһеҙлектәр, айырым алғанда, баҫыу эштәрен һуңлап башҡарыуҙа һәм сифатын түбәнәйтеүҙә, тракторҙар ремонтын һуҙыуҙа һәм уларҙы тулыһынса файҙаланмауҙа, колхоздарҙа общественный малсылыкты үҫтереү планын үтәмәүҙә күҙәтеләләр.

* * *

1948 йылда ауыл хужалығы алдында яңы, ҙур бурыстар тора. 1948 йылда беҙ төп ауыл хужалығы культураларының урожайы бу- [illegible]

дырышлы, ҡый үләндәренән таҙа, көҙҙән туңға һөрөп ҡалдырылған участкаларға сәсеү бик мөһим. Бынан башка, сәсеүлектәрҙе бик яҡшы итеп тәрбиәләргә, үҙ ваҡытында утарға, урындағы һәм минераль ашламалар менән аҙыҡландырырға кәрәк. 1948 йылда орлоҡ участкаларында яҙғы бөртөклө ашлыҡ культураларын районлаштырылған, айырыуса күп урожай бирә торған сортлы орлоҡтар менән генә сәсергә кәрәк.

Сәсеү әйләнеше — юғары һәм тотороҡло урожай алыуҙың һәм ерҙең уңдырыу сифатын күтәреүҙең тура юлы. 1948 йыл планы буйынса 30.410 колхозда дөрөҫ сәсеү әйләнеше индереү баҙланағал.

Баҫыуҙарҙа, соҡорҙарҙа ағас ултыртыу, көмлө ерҙәрҙә яҡшыртыу һәм башка шундай саралар урожайҙы күтәреүҙә айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар.

1948 йылда трактор эштәренең күләме 31 миллион гектарға арта һәм һуғышҡа тиклемге кимәлдең 94 процентен тәшкил итәсәк. Был, бөтә машина-трактор паркын иҡһы сифатлы итеп ремонтлауҙы ғына түгел, бәлки машиналарҙы яҡшылап тәрбиәләүҙе лә талап итә.

Трактор эштәренең сифатын күтәреү менән бер рәттән, һәр бер трактористең смена нормаларын үтәүе өсөн көрәшеү һәм тракторҙарҙың ике сменала эшләүҙәрен ойоштороу — трактор паркының эшләп сығарыуын күтәреү юлдары шулар.

СССР Союзы Министрҙар Советы 1948 йылдың 27 гинуарында МТС-тарҙың колхоздар менән яңы типовой договорын раҫланы. Уның нигеҙендә төҙәлгән договорҙар закон көсөнә эйә булалар һәм колхоздар тарафынан да, МТС-тар тарафынан да мотлаҡ һәм теүәл рәүештә үтәлергә тейештәр.

Договор МТС-тарҙы һәм колхоздарҙы урожайлылыҡтың билдәле бер күләменә өлгәшергә, баҫыу эштәренең сифатын ҡырҡа яҡшыртырға, алдынғы агротехниканы ҡулланырға, колхоз ауылының хеҙмәт һәм материаль-техник ресурстарын тулыһынса файҙаланырға мәжбүр итә.

Машина-трактор станциялары трактор эштәренең сифатын күтәрергә, баҫыу эштәрен агротехник сроктарҙа үтәргә, урожайҙы үҙ ваҡытында йыйырға, натуралата түләү планын үтәргә бурыслылар.

Договорға ярашлы рәүештә, һәр бер смена тамамланғандан һуң МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙәре һәм колхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадалары бригадирҙәре тракторҙар тарафынан эшләнгән эштәрҙе ҡабул итеп алалар.

МТС эштәрҙе һуңлап башҡарған халдә ул эштәр натуралата түләүҙең түбәнерәк ставкалары менән баһаланалар. Икенсе яҡтан, [illegible]

Ужым ашлыҡтары илебеҙҙең иген балансында бик ҙур урын алып тора. Ужым культураларының урожайы уларҙың иртә һәм нисек үҫә башлауҙарына күп дәрәжәлә бәйләнгән. Ғилми учреждениеләр һәм ауыл хужалығының алдынғы практикаһы тарафынан ужым культураларын көҙ тәрбиәләүҙең бик файҙалы саралары (сәсеүлектәрҙе ашламалар менән аҙыҡландырыу һәм тырматыу) эшләнде. Был саралар ужым культураларының үҫеүен тиҙләтеүгә ярҙам итәләр. Әгәр гәзәттәге йылдарҙа ужым сәсеүлектәрен тырматыу гектарға уртаса 1—2 центнер, ә аҙыҡландырыу 3—5 центнер өҫтәмә урожай бирген булһа, ағымдағы йылда был сараларҙы ҡулланыуҙан урожайҙың артыуы күберәк булыуы мөмкин.

Колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу өсөн 1948 йылда күп эштәр эшләргә тура киләсәк. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаны ҡулланыуҙың етерлек булмауын күрһәтеп үтте. Эшләп сығарыу нормаларын һәм хеҙмәт көндәре менән хеҙмәт расценкаларын яңынан көндәрҙә ҡайтанан ҡарап сығырға кәрәк. Яңы нормаларҙың нигеҙенә алдынғы колхоздарҙың, бригадаларҙың, звеноларҙың, айырым колхозсыларҙың тәжрибәләре һәм өлгәшеүҙәре һалынырға тейешле.

1948 йылда СССР-ҙың ауыл хужалығы тракторҙарҙың һәм урожай йыйнау машиналарының яңы, камиллаштерелгән: ҡеүәтле «С-80» тракторҙарын, «СТЗ-АТЗ» дизель тракторҙарын, уртаса ҡеүәтле «КД-35» гусеницалы тракторҙар, «Сталинец-6» тағылма комбайндар, үҙе йөрөй торған комбайндар аласаҡ. Камиллаштерелгән дискалы трактор лущильниктәре, трактор һабандары, тракторға тағып йөрөтелә торған сәскестәр (бөртөклө ашлыҡ һәм үлән сәсеү өсөн), орлоҡ таҙартыу машиналары эшләнделәр һәм массовый рәүештә эшләп сығарыу өсөн производствоға тапшырылдылар. Айырыуса яҡшы камиллаштерелгән сапҡыстар (ат егеп һәм тракторға тағып йөрөтелә торған бесән сапҡыстар) массовый рәүештә эшләп сығарыу өсөн ҡабул ителде. Үҙе йөрөй торған бесән сапҡысҡа һынау үткәрелде һәм яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе. Картуф ҡаҙый торған трактор машинаһы, сөгөлдөр йыя торған комбайн, тәмәке рассадинге ултырта торған машина эшләү промышленность тарафынан 1948 йыл планына индерелде. Мамыҡ йыйнау машинаһының конструкцияһы эшләнде.

Ҡатмарлы машиналарҙы идара итеү ҙур күнекмәләр, оҫталыҡ һәм техник белем талап итә. Ағымдағы йылда трактористәр, трактор бригадалары бригадирҙәре, комбайнерҙар һәм уларҙың ярҙамсыларын, степ ҡалкыусылар, электромеханиктәр, электромонтерҙар һәм башҡа квалификация работниктәрен әҙерләү һәм ҡайтанан әҙерләү айырыуса ҙур ҡолас аласаҡ.

МТС һәм колхоздарҙың эске ресурстарын мобилизациялаған һәм резервтарын киң рәүештә файҙаланған халдә генә, ағыулыҡты, аҡса средстволарын экономиялы файҙаланған халдә генә, колхоздарҙа, совхоздарҙа, машина-трактор станцияларында финанс дисциплинаһын ныҡ һаҡлаған халдә генә социалистик ауыл хужалығы алдында торған бурыстарҙың уңышлы хәл ителеүе мөмкин.

Кестәрҙе дөрөҫ урынлаштырыу, уларҙы алда торған бурыстарҙы үтәүгә мобилизовать итеү, партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарының үҙ ваҡытында үтәлеүен контроль аҫтына алыу, партияның политикаһын көн һайын аңлатыу, колхозсыларҙың һәм ауыл хужалығы специалистәренең ижади инициативаларының үҫеүе турағында хәстәрлек — урындағы етәкселәрҙән хәҙер бына шулар талап ителә. Алдынғыларҙың тәжрибәһенә айырыуса иғтибар! Ул ауыл хужалығы үҙендә нинди ҙур мөмкинлектәр һаҡлағанын күрһәтеп бирә.

[illegible]

П. ЛОБАНОВ,
СССР Ауыл хужалығы Министренең урынбаҫары.

Партия тормошо

Минең тәжрибәм

Мин быйылғы уҡыу йылында «Үҫәкле» һәм Ленин исемендәге колхоз партия ойошмаларының политик мәктәптәрен етәкселек иттем. [illegible]

[illegible] сығыш яһауға өйрәтеүҙә ҙур ярҙам итте.

Занятиеләр үткәргәндә мин карта, диаграмма, альбом һәм схема кеүек күргәҙмә пособиеләр ҡулланыуға ныҡлы иғтибар бирҙем.

Уҡыу программаһы тамамланғанға тиклем 15 көн алдан һорауҙар төҙөп политик мәктәптәргә тараттым. Шуныһыҡтан уҡыусылар һынауҙарға ныҡлы әҙерләнеп килделәр. Мин етәкселек иткән һәм беркетелгән 5 мәктәптә 92 кеше уҡыны һәм шуларҙан 82 кеше политик мәктәптәрҙе тамамлап сыҡты.

Политик мәктәп тамамлаған иптәштәр «ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын» өйрәнеү өсөн белем нигеҙе һәм күнекмәләр ала алдылар.

Ш. Шакиров,
ВКП(б) Нармәкәй райкомының пропагандисе.

Комсомолдың бөтә райкомдарына, солидарлыҡ һәм берҙәмлек билдәһе итеп, ВЛКСМ Үҙәк Комитетенең Ҡыҙыл Байрағы тапшырыла.

Һүрәттә: ВЛКСМ-дың Маҡар райкомы бюроһы члендәре Д. Ишмөхәмәтова, Н. Яйбаев, К. Рәзяпов, Д. Левкин һәм А. Мельников иптәштәр яңы ғына ҡабул итеп алынған Ҡыҙыл Байраҡ алдында.

Л. Якубов фотоһы.

Хата юнәлеш биреүсе бер карар турағында

ВКП(б)-ның Бишбүләк район комитеты бюроһы күптән түгел генә «Правлениеның эшмәкәрлегенә партия контролен тормошка ашырыу турағында» Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретаре иптәш Игнатьевтең отчетын тыңланы. Был партия ойошмаһы — егерменән артык коммунисте берләштереүсе, районда иң ҙур ойошмаларҙың береһе. Шулай булыуға карамаҫтан, колхоз производствоһында коммунистәрҙең йоғонтоһо бик аҙ. Колхозда яҙғы баҫыу эштәре бик һүлпән темп менән һәм тарҡау рәүештә бара. Агротехниканы бороуҙарға юл ҡуйыла. Һөйлә тартыу көстәре эшкә тулыһынса файҙаланылмай. Колхозсылар араһында хеҙмәт дисциплинаһы түбән. Эшкә һуң сығыу, иртә ҡайтыу гәзәткә инеп киткән. Эш ваҡыты ла тулыһынса файҙаланылмай. Хеҙмәткә ярарлы кешеләрҙең 80 проценттан артығы яҙғы баҫыу эшендә бөтөнләй ҡатнашмай. Ә 2—5 май көндәрендә эш бөтөнләй туҡтатылды. Правление члендәренән башлап (председателе иптәш Исаев), бөтә колхозсылар был көндәрҙә баҫыуҙа эшләмәнеләр.

Бындай түҙеп торғоһоҙ хәлдең сәбәбе нәмәлә һуң? Бәтәһенән элек, партия ойошмаһының яраҡһыҙ, күптән ғәйепләнгән метод менән эшләүендә. Бында политик-массовый эш ташландыҡ участка булып тора. Йыл башынан алып колхозсыларҙың политик, тәбиғәтфән темаларында бер генә тапҡыр ҙа әҙерлекле доклад һәм лекция тыңлағандары, агитаторҙарҙың беседаларын ишеткәндәре юҡ. Стена газетаһы, «боевой листоктар» сығарылмай. Коммунистәр производствоның хәл иткес тармаҡтарына беркетелмәгәндәр.

Партия ойошмаһы секретаре иптәш Игнатьев, правлениеның эшмәкәрлегенә контроль хоҡуҡын тормошҡа ашыраһы һәм политик етәкселекте тәьмин итәһе урынға, тупаҫ администратор булып күренгән. Ул, колхоз правлениеһы һәм уның председателен урынын үтеп, хужалыҡтың ваҡ-төйәк эштәренә лә үҙе ҡыҫыла; тартыу көстәрен бүлеү, бригадирҙарға кендәлек нарядтар биреү кеүек политик етәкселек менән һис бер уртаҡлығы булмаған мәсьәләләр менән шөғөлләнә.

— Беҙ хәҙер колхозда кем председатель булыуын да белмәйбеҙ, Игнатьев бер төрлө һөйләй, ә Исаев икенсе төрлө күрһәтмә бирә. Аптыраныҡ! — тиҙәр колхозсылар.

Эйәһеҙлек, баш-баштаҡлыҡ арҡаһында яҙғы баҫыу эштәренең өҙөлөү ҡурҡынысы килеп тыуғас, Игнатьев үҙен аҡлау өсөн:

— Исаев үҙе сәбәпсе, хәҙер мин колхоз эшенә ҡыҫылмайым, — тип белдерә.

ВКП(б) райкомы бюроһы Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһының һәм уның секретаре иптәш Игнатьевтең эш стилендәге был сериоз хатаны төҙәтергә һәм колхоз правлениеһының эшмәкәрлегенә дөрөҫ политик етәкселекте тәьмин итеүгә йүнәлдерелгән ҡарар ҡабул итергә тейеш ине. Ләкин бюро быны эшләмәне. Бюро ҡарарында:

«Сталин исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретаре иптәш Игнатьевте яҙғы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрергә мәжбүр итергә», — тип яҙыла. Ә бит, һүҙ уңайында ғына, колхозсылар араһында массовый-политик эште йәйелдереү турағында әйтелә.

Шулай итеп, райком бюроһы партия ойошмаһына үҙе үк хата юнәлеш бирә. ВКП(б)-ның XVIII конференцияһы партия ойошмаларының хужалыҡ органдары функцияларына инеүҙәрен ҡаты ғәйепләне һәм политик етәкселекте көсәйтеүҙе, партия-политик һәм ойоштороу эштәренең кимәлен күтәреү юлы менән хужалыҡ пландарының уңышлы үтәлеүен тәьмин итеүҙе ҡәтғи рәүештә талап итте. Конференцияның яңы шарттарҙа эшләү турағында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең күрһәтмәләренә нигеҙләнеп яҙылған был ҡарары — бөтә партия ойошмалары өсөн закон. Ләкин Бишбүләк райкомының бюро члендәре (секретаре иптәш Хаматов) быны оноттандар, күрһәк. Партия ойошмаһы яҙғы сәсеүҙе туранан-тура үҙе түгел, правление аша үткәрергә тейеш. Уның бурысы — дөрөҫ политик етәкселек итеүҙән, правлениеның эшенә контроль яһауҙан тора. Ә райком бюроһы, был хәҡиҡәтте оноотоп, үҙе хата күрһәтмә бирә.

Яр. Вәлиев.

Производствоны ойоштороусылар

Өфө металл штамплау заводы коллективы һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыктың өсөнсө йылы планын 5 октябргә үтәү өсөн көрәшеп, Беренсе Май алды социалистик ярышында ҙур уңыштарға өлгәште. Завод 5 айлыҡ планын 30 апрелгә үтәне.

Заводтың ябай эшсеһе лә, инженер-техник работнигы ла был уңыштар менән бер тигеҙ ғорурлана. Һәм сталинсе биш йыллыҡ планда ҡаралған сараларҙы нисек тә булһа тиҙерәк тормошҡа ашырыу, Тыуған илебеҙҙе тағы ла ҡеүәтлерәк итеү теләге менән йәшәй. Был тойғо заводта специалист менән эшсене тығыҙ берләштерә. Улар, ҡулға-ҡул тотошоп, Ватанға фидакәр хеҙмәт итәләр.

Специалист менән эшсе араһындағы хеҙмәт дуҫлығы тойғоһо совет кешеләренең традицион үҙенсәлеге ул. Заводтың уңышҡа өлгәшеү сере бына ошонда тора ла.

Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн социалистик ярышҡа, эшселәр менән бергә, заводтың специалистәре лә ҡушылдылар. Технолог А. Ивановтың ҡиммәтле инициативаһы заводтың техник интеллигенцияһы хеҙмәтенә новаторлыҡ инициативаһы [illegible] ҡуйҙы, уларҙы туранан-тура агрегаттарға һәм станоктарға яҡынайтты. Уларҙың эшен яңы йөкмәтке менән байытты. Хәҙер заводта һәр бер специалист [illegible]

ҙе тағы ла камиллаштерҙеләр һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең яңы мөмкинлектәрен астылар. Баш инженер Васильев, технолог Новожилов, цех начальниктәре инженер Щербаков, Свечников, техник Лебедев һәм Сәстова иптәштәр яңы методтарҙы производствоға ҡыйыу индереүселәр булдылар.

Быға тиклем деталдең ҡапҡасына борауллау һәм зиңковка яһау айырым алып барыла һәм был эште ес кеше башҡара ине. Инженерҙар борауллау станогына алты шпинделле ҡулайлаштырыу эшләнеләр. Был, ике операцияны бер юлы алып барырға, етештереүсәнлекте ике ярым тапҡырға арттырырға һәм ике эшсене башҡа эшкә күсерергә мөмкинлек бирҙе. Әлегәсә завод ошо деталдең полуфабрикатын Черниковск машиналар төҙөү заводынан алып килде. Һәр бер ҡапҡас 12 һум 50 тингә төштө. Заводтың инженер-техник работниктар коллективы тегель мейестәре эшләп, кокель ҡойоуҙы ойоштороп, деталде заводта етештереү юлын таптылар. Хәҙер был деталдең хаҡы 1 һумға төшә.

Завод специалистәре, техник-ойоштороу саралары планын тормошҡа ашырып, бик күп яңы инструменттар эшләп сығарыу, ҡулайлаштырыу [illegible]

Һынса эштәрен дауам итәләр. Бер деталгә модернизация үҙгәрәүҙе ғына етештереүсәнлекте 2,5 тапҡырға арттырҙы. Хәҙер улар яңы аппарат өҫтөндә эшләйҙәр. Был аппаратты эшләп сығарыуҙы үҙләштереү ауыл хужалығы механизаторҙарына трактор, комбайн, автомашиналарҙың моторҙарын эксплоатациялау срогын оҙонайтырға мөмкинлек бирәсәк. Аппараттың беренсе партияһы эшләнде лә инде.

Завод специалистәре үҙҙәренең ролдәре производство кимәлен күтәреүҙә файҙалыраҡ юлдар табыу һәм технологик процестарҙы эшләү менән генә сикләнеп ҡалмағанлығын аңлайҙар. Был уларҙы ҡәнәғәтләндермәй. Улар цехҡа, эшселәр янына барып, деталдәрҙе эшкәртеү процестарын үҙләштерергә, яңы инструмент менән ҡулланырға өйрәтәләр һәм уҡытыусы-өйрәтеүсе сифатында. Үҙҙәренең ғилми-техник хеҙмәттәренең роль булғанлығын күрмәй тороп, үҙҙәре сығарылған ҡоралдарының һәм яңы эшкәртеү процестарының продукция эшләп сығарыуҙы, продукцияның сифатын яҡшыртыуҙы һәм уның үҙенә төшеү хаҡын кәметеүҙә фактик тәьҫир итеүен аңлашы белмәй тороп, производство участкаларынан китмәйҙәр.

Завод специалистәре, эшселәр [illegible]

[illegible]

С. Мулюков,
М. Кәримов.

СОЦИАЛИСТИК ЯРЫШТА АЛДЫНҒЫЛАРҒА ТИҢЛӘШЕРГӘ!

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективе иптәш Сталингә биргән вәғәҙәһен уңышлы үтәй

Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективе бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта быйыл бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү майҙанын 4.795 гектарға киңәйтергә, 8100 гектар бойҙайҙың һәм 2325 гектар арыштың һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға һүҙ биргәйнеләр.

Хәҙер бөтә коллектив үҙ йөкләмәһен намыҫ менән үтәү өсөн баҫымлы эшләй. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш В. Солонин етәкселек иткән звено члендәре яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн социалистик ярышта һоҡландырғыс хеҙмәт батырлыҡтары күрһәтәләр. Бында машина-трактор паркы тәүлек әйләнәһенә бөтә ҡеүәтендә файҙаланыла. Йәш тракторист иптәш Г. Носков үҙ агрегаты менән бер сменала 210 гектар ашлыҡ сәсте. Башҡа трактористар ҙа смена һайын 170—180 гектар ашлыҡ сәсәләр.

Бөгөн газетабыҙҙа Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының Октябрьск бүлексәһе алдынғыларының сығыштары урынлаштырылды.

ҺӘР БЕР МИНУТ ИҪӘПТӘ

Үҙемдең тракторымды тулы ҡеүәте менән эшләтеү өсөн һабан [illegible] тәүге көндәренән үк бөтә сараларҙы күрҙем. Тракторҙы ҡышҡы осорҙа уҡ яҡшылап ремонтланым. Эшкә тотонғас та, [illegible] дефект [illegible].

Көндәлек нормаларҙы үтәүҙән һәм артығын үтәүҙән [illegible] ойоштора белеү хәл итә ине. Шуға күрә мин һабан һөргән [illegible] ашлыҡ сәскәндә лә [illegible] ҡатын-ҡыҙҙарҙы һайлап алдым. Уларға сәсеү барышында эш көнөнөң һәр бер минутын дөрөҫ файҙаланыуға ҡарата [illegible] аңлаттым. Совхозда билдәләнгән тәртип буйынса эште ике сменала ойоштороуҙа. Мин, тәжрибәле тракторист булараҡ, [illegible] ла тәүге сменала эшләүҙе үҙ өҫтөмә алдым.

[illegible]

Орлоҡ ташыусылар [illegible] ер башына килтереп [illegible] сәскестәргә тултырыусылар прицепщиктарға ярҙамлаша торған булдылар. [illegible] сәскестәрҙе тултырыу ваҡыты 3—4 минутҡа тиклем ҡыҫҡартылды. [illegible]

Бына шулай эшләү арҡаһында мин смена заданиеләрен 150—200 процентҡа үтәп барам.

И. Лаушкин,
Тракторист.

Иң яҡшы агротехник сроктарҙа

Үҙгән йылда минең звено 26 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 33,8 центнер урожай үҫтереп алды. [illegible] иң яҡшы агротехник сроктарҙа, юғары сифатлы итеп сәсеүебеҙҙе әйтәм. [illegible]

[illegible] сәсеүгә 200 процентҡа еткереп үтәү өсөн көрәш асты. Сәсеүҙе эшләүсе Григорий һәм Иван Носковтар, Анатолий һәм Федор Родиндар, Лаушкин һәм Акульчев иптәштәр үҙ-ара ярышта гүзәл хеҙмәт күрһәткестәре бирәләр. Икешәр һәм икешәр ярым норма үтәү уларҙың көндәлек гәҙәтенә инде.

Шик юҡ: яҙғы сәсеүҙә беҙҙең механизаторҙар юғары темпты тиңләштереп һәм илтен иң яҡшы агротехник сроктарҙа башҡарылыуын тәьмин итерҙәр.

В. Солонин.
Социалистик Хеҙмәт Геройы, Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозының звеноводы.

Төндә лә көндөҙгө кеүек эшләйбеҙ

Ер һөрөүҙә төнгө сменала күскәс, ҡайһы бер тракторҙар [illegible] минең менән ярышыусы Анатолий Родин үҙенең нормаһын үтәп сыға алмауы тураһында белдерҙе. Был — совхоз механизаторҙары өсөн бик хурлыҡлы хәл ине. Беҙ, трактористар, ял ваҡытында [illegible] тикшерҙек: тракторҙың алдында ғына фаралар [illegible] Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Солонин да беҙҙең тәҡдимде хупланы [illegible].

Һөрөүҙән, тырматыуҙан сәсеү эшенә күскәс, прицепщиктарҙың бер-береһенә ярҙам итеп [illegible] һәм тиҙ хәрәкәт итеүҙәренә өлгәштек. Орлоҡто сәскестәргә тултырыу элек төнгө сменала минең агрегатта 10—15 минут ваҡытты алған булһа, хәҙер был эш 4—5 минут эсендә башҡарыла.

Ф. Носков.
Тракторист.

Агрегат берҙәм эшләргә тейеш

Яҙғы сәсеүҙә эшләгәндә агрегаттың берҙәмлеге ҙур роль уйнай. Әгәр прицепщиктарҙың береһе, әйтәйек, орлоҡто сәскестәргә тултырғанда аҡрынраҡ ҡуҙғала икән, ул бөтә агрегаттың эшенә тотҡарлыҡ яһай. Бына шуның өсөн дә мин агрегаттағы алты сәскестең һәр ҡайһыһына тәжрибәле прицепщик һайлап алдым.

Әгәр ҙә прицепщиктар бары тик сәскестәргә орлоҡ тултырыуҙы ғына белһәләр, улар үҙҙәренең эштәрен тулыһынса үтәмәгән булырҙар ине. Минең агрегаттағы прицепщиктар сәскес дискаларының әйләнешен иғтибар менән күҙәтеп, уларҙы ер башына сыҡҡан һайын таҙартып баралар. Шул рәүешсә дискаларҙы таҙартмағанда, норма буйынса билдәләнгән орлоҡ дөрөҫ сәселмәйенсә артып ҡалыр ине. Ә беҙ һәр гектарға 180 килограмм иҫәбенән сәсәбеҙ.

Агрегаттың берҙәмлеге юғары эш темптарын тәьмин итә. Тәүге көндәрҙә мин сменаға 120—130 гектар сәсә инем. Хәҙер сменаға 170 — 180 гектарҙан да кәм сәскәнем юҡ. Бергәләп ярышып эшләү һөҙөмтәһендә беҙҙең Октябрьск бүлексәһе сәсеү планын тултырып бара инде.

Е. Акульчев.
Тракторист.

Дискаларҙы йышыраҡ таҙартырға

Ҡалҡыу һәм тигеҙ ерҙәрҙә ашлыҡ сәскәндә [illegible] сәскестәргә норма буйынса [illegible] ҡала башланы. Уға тиклем һәр гектарға 180 килограмм бойҙай орлоғо тәп-тәүәл ета ине.

Социалистик Хеҙмәт Геройы Василий Солонин беҙҙең сәскестәрҙе ҡарап, хатабыҙҙы күрһәтте. Сәскестәрҙең дискаларын ер башына [illegible] ланыуға ла килтерәсәк ине.

Хәҙер беҙ сәскестәрҙең дискаларын мөмкин тиклем йышыраҡ таҙартып йөрөтәбеҙ.

А. Гордеева.
Прицепщик.

Ярыш темптары

Ерҙең буйынан-буйына ҡарап барһаң, күҙҙәрең талыр. Оло юл сатлығынан түкәрәк күлгә тиклем ара ике километр тип иҫәпләнә. Ә участкаһың башы ул күлдән дә арыраҡ. Бөтәһе—3200 метр! Тракторында шул ерҙе буйлатып әйләнеп сыҡҡансы алдағы сәскес эҙенән күҙ яҙҙырмаҫҡа, беләктәрең талһа ла, рулде туп-тура тотоп барырға кәрәк. Сәсеүгә сығыуҙың тәүге көндәрендә тракторҙа сәғәттәр буйына хәрәкәтһеҙ ултырыу ҡыйын була ине. Григорий үҙенең йомшаҡлығына асыуланып, смена ваҡытын көтөп, ҡояшҡа әйләнеп-әйләнеп ҡарай торғайны. Шул күнегеп етмәгәнлектәндер инде, беренсе көндәрҙә ул билдәләнгән норманы саҡ-саҡ ҡына тултыра ала ине. Һөрөү эштәрен тамамлап бойҙай сәсергә тотонғас, Григорийға үҙенең егетлеген күрһәтергә тура килде.

Ул көндө яңы ғына сменанан алмашынған Егор Акульчев Григорий эргәһенә килде лә, әйтте лә һалды:

— Беҙ һинең менән ярышабыҙ бит? Ярышабыҙ. Көндеҙ һабан һөргәндә һин минән уҙҙыра алмаһың. Төнгө сменала сәсеүгә тотонабыҙ хәҙер. Йә әйт: һәр сменала күпме сәсмәксе булаһың?

Григорий Носков өлкән дуҫының тура әйтелгән һүҙҙәрен ишетеп ҡыҙып китмәне. Бер аҙ уйлап торғас ҡына яуап ҡайтарҙы:

— Йөҙ етмеш гектар.

— Йөҙ етмеш! Ай-һай, ҡустым, мин тракторҙа уҡ йыл эшләп тә ундай хәлде күргәнем юҡ.

Григорий уның менән бәхәсләшмәне. Тракторҙа өсөнсө генә сезон эшләһә лә, тәжрибәле ирҙәрҙән ҡалышмаясағына ышана ине ул. Шуға күрә Акульчевте ҡултыҡлап алды ла, шаян һүҙҙәр әйткән булып, звеновод эргәһенә алып китте.

— Беҙ бына Егор ағай менән һөйләштек, сменаға 170-шәр гектар сәсергә йөкләмә алдыҡ.

Звеновод — Социалистик Хеҙмәт Геройы Солонин егеттәрҙәге ҡыйыулыҡтың ҡәҙерен белә торған кеше. Григорийҙың һүҙҙәрен ишеткәс, шикләнер урын ҡалдырмаҫлыҡ итеп әйтте:

— Һеҙгә ышанам. Тик эштең сифаты яҡшы булһын.

Киске сменала икеһе лә бер үк ваҡытта эшкә тотондолар. Григорий тракторға ултырғансы уҡ сәскестәрҙе үҙе ҡарап, тикшереп сыҡты. Орлоҡ ташыусыларҙы киҫәтеп ҡуйҙы: бер генә минутҡа ла тотҡарлыҡ булмаһын!

Өс километрҙан артыҡҡа һуҙылған участканы беренсе тапҡыр әйләнеп сыҡҡансы уҡ ҡояш байыны. Киске эңерҙә тракторҙың фаралары тоҡандырылды. Алда йәйелеп ятҡан ерҙең яҫы ҡалҡыулыҡтары һәм соҡор урындары Григорий өсөн бик яҡшы таныш ине. Электр яҡтыһында ерҙе алыҫтан күреп булмағанлыҡтан, ундай урындарҙы алдан уҡ билдәләп үтергә һәм шуға ярашлы рәүештә машинаның ҡыҙыулығын йә арттырырға, йә кәметергә тура килде. Иң мөһиме — элек үткән эҙҙе күҙҙән юғалтмау. Бер нисә сантиметрға яңылышыу ҙа бөтә тырышлыҡтарҙы юҡҡа сығарыр: звеновод Солонин насар сифатлы эш өсөн ғәфү итеүҙең нәмә икәнлеген белмәй. Оло майҙанда һәр гектарҙан 30-ар центнер урожай үҫтереп алырға һүҙ бирҙеләр бит улар. Ҡыш буйына ҡар тоттолар, тиреҫ сығарҙылар. Григорий үҙе һөрҙө был ерҙе, үҙе культивацияланы, тырматты. Хәҙер, сәсеү ваҡытында, аҙ ғына иғтибарһыҙлыҡ күрһәтеү ҙә үҫтерәсәк урожайҙың сифатына зарар килтерер ине.

Тракторға бураҙнала заправка яһау совхоз механизаторҙарының көндәлек эш ғәҙәтенә ингәйне. Ә бына ҡайнар аш ашап алыу өсөн бер нисә минутҡа ғына туҡталырға кәрәк бит инде. Ләкин, сәскестәрҙе ҡарап барыусы ҡыҙҙар Григорийға нисә тапҡыр әйтеп ҡараһалар ҙа, ул тракторын туҡтатманы. Төн уртаһы ауышҡас ҡына прицепщик ҡыҙҙар ер башында ҡулына һауыт-һабалар тотҡан килеш һуҡырана-һуҡырана үҙҙәрен көтөп тороусы ҡатынды күрҙеләр.

— Ашарға ла туҡталмайбыҙмы? — тинеләр ҡыҙҙар.

Григорий ҡире ҡаҡмаҫлыҡ тауыш менән әйтте:

— Ултырып барғанда аш тағы ла әйбәтерәк үтә ул, ҡыҙҙар. Сәсеүҙе бөтөргәс туҡталып, иркенләп ашарбыҙ.

Смена алмашынғанға тиклем туҡталып тороу тураһында һүҙ ҡуҙғатыусы булманы. Йәш трактористың минуттарҙы ла әрәм итмәҫкә тырышыуын аңламаҫлыҡ түгел ине.

Таң атҡансы, яҡтырғансы тракторҙың моторы тынып торманы. Смена алмашыныр ваҡыт еткәс тә, Григорий үҙенең машинаһынан төшмәҫ ине, бәлки. Ләкин, трактор участканы тағы бер тапҡыр әйләнер өсөн боролғас, Солонин үҙе йөгөрөп килеп етте.

— Туҡталырға кәрәк,—тине ул. —180 гектарҙы ҡапланың. Хәҙер һинең менән тиңләшергә теләүселәр бераҙ гена булмаҫ инде, Гриша ҡустым.

Григорий Носков менән тиңләшергә теләп ярышҡа сығыусылар шул иртәлә уҡ үҙҙәренең һүҙҙәрен әйттеләр. Шул көндә уҡ Октябрьск бүлексәһендә генә түгел, бөтә совхоз баҫыуҙарына таралды был йәш трактористың дañы. Ләкин комсомолец Григорий өсөн 180 гектар — эшләргә мөмкин булғандың бөтәһе лә түгел ине әле. Ул көндөҙгө ял ваҡытында прицепщиктарҙы һәм орлоҡ ташыусыларҙы йыйнап һөйләште. Заправка һәм орлоҡ тейәү ваҡыттарын тағы ла ҡыҫҡартырға, ашау өсөн машинаны туҡтатып тормаҫҡа булдылар. Бөтә эштә лә етеҙлек һәм теүәл иҫәп кәрәк.

Кисен эшкә тотонғанда Григорий Носков 180—190 гектар сәсә-сәсәгенә шикләнмәй ине. Был төндә ул бөтә совхозды һоҡландырырлыҡ эш күрһәтте: Носковтың агрегаты 210 гектар майҙанға бойҙай сәсте. Смена алмашынғас та, трактористар уны ҙур еңеү менән ҡотларға килделәр. Үҙенең ҡулын ҡыҫып шатлыҡлы һүҙҙәр әйтеүсе дуҫтарының һуңғы ике көндә шундай күрһәткестәр биреүҙәрен Григорий Носков бик яҡшы белә ине инде. Бына уның менән ярышыусы Егор Акульчев бөгөн 175 гектар ашлыҡ сәскән. Иван Носков та ағайынан — Григорийҙан ҡалышмау өсөн тырышҡан. Һөрөүҙә эшләүселәрҙең почет таҡтаһында уның исеме беренсе урында тора. Смена заданиеләрен 200 проценттан да кәм итеп үтәмәй ул һәм һәр көн һайын эш күрһәткестәрен арттыра бара. Улар бөтәһе лә Григорий Носковты ҡотлайҙар һәм уның менән тиңләшеү өсөн тағы ла нәмәләр эшләргә кәрәклеге тураһында уйлайҙар, шул турала кәңәшләшәләр.

Совхоздың данлы кешеһе —Социалистик Хеҙмәт Геройы Солонин уларҙың ынтылыштарына юҡәлеш биреү, алынған темптарҙы төшөрмәү өсөн бөтәһен дә эшләй. Һәр кемдең машинаһын ҡарап, кәңәштәр бирә. Кәрәк икән, егеттәрҙең ҡайһы берәүҙәре төнгө сменала эшләгәндә арып китһәләр, уларҙы алмаштырып таңға тиклем үҙе һөрә. Бөтәһе лә бер маҡсатҡа — юғары урожайҙың нигеҙен һалыу, яҙғы сәсеүҙе иң яҡшы агротехник сроктарҙа тамамлау өсөн йүнәлтелгән.

F. Әхмәтшин.
(Махсус хәбәрсебеҙ).
Йылайыр совхозы.

Экзамендәр алдынан

Һүрәттә: Өфө ҡалаһы 11-се мәктәп уҡытыусыһы А. А. Шаховская 5-се «Б» класс уҡыусылары менән рус теленән консультация үткәрә.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

1. Медицина институтында

Башҡорт медицина институтында экзамендарға әҙерлек бара. Был мәсьәлә буйынса барлыҡ курстарҙа ла йыйылыштар үткәрелде. Студенткалар һәм студенттар үҙ өҫтәренә ҙур йөкләмәләр алдылар. Экзамендәргә өлгөлө әҙерләнеү — һәр бер совет студентенең намыҫ бурысы.

Хәҙер бында ҡыш буйына уҙған материалларҙы ҡабатлау дауам итә. Институттың библиотекаһы һәм уҡыу бүлмәләре экзамендарға әҙерләнеүселәр менән тулы була.

Курс экзамендәре менән бер рәттән государство экзамендәренә әҙерлек бара. Институтты тамамлаусыларға квалификациялы лекциялар уҡыла һәм консультациялар бирелә.

Һ. Рәфикова.

2. Ҡабатлауға төп иғтибар

Өфө ҡалаһының 14-се мәктәбендә экзамендарға әҙерләнеү уңышлы дауам итә. Бында уҡытыусылар һәм уҡыусылар коллективе үтелгән материалды ҡабатлауға төп иғтибарҙы бирәләр. Балаларға уҡыу йылы буйына уҙғандарҙы еңелерәк иҫкә төшөрөү һәм ҡабатлауҙа ярҙам итеү өсөн математика, тарих һәм әҙәбиәт фәндәре буйынса 5 теоретик конференция, әсә теле, әҙәбиәт һәм физиканан обзор лекциялар ойошторолдо. Экзамендәргә һәм һынауҙарға әҙерләнеүселәр өсөн махсус бүлмә бар, унда төрлө фәндәр буйынса «ҡабатлау мөйөштәре» эшләй. Улар карталар, күрһәтмә пособиелар, уҡыу китаптары, художестволы әҙәбиәт менән йыһазландырылғандар.

Х. Вәлитов.

3. Улар яҡшы әҙерләнәләр

ЧЕРНИКОВСК. Ҡаланың етенсе номерлы ете йыллыҡ мәктәбендә уҡыусылар экзамендарға һәм һынауҙарға ҙур дәрт менән әҙерләнәләр. Үтелгән дәрестәрҙе ҡабатлау бында дүртенсе сиректең беренсе көнөнән үк башланды. Был осорҙа биш һәм дүрт билдәләре алыусыларҙың һаны байтаҡ артты.

И. Нигмәтуллин.

4. Срогынан алда

К. А. Тимирязев исемендәге Башҡортостан государство педагогия институтында срогынан алда экзамендар тапшырыу башланды. Экзамендарҙың уңышлы барышы студенттарҙың сереҙ әҙерләнгәнлектәрен күрһәтә.

Миҫал итеп география факультетенең II курс студенттарының педагогика буйынса экзамен һөҙөмтәһен күрһәтергә мөмкин (уҡытыусы — педагогия фәндәре кандидаты доцент Тимергазин). Курста 33 студент булып, шуларҙан 15-е отличноға, 12-һе яҡшыға, ҡалған 6-һы ғына уртаса билдәләргә тапшырҙы.

Экзамендәр дауам итә.

Ф. Иҫәнғолов.

Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына яуапһыҙ ҡараşты бөтөрөргә

Беҙҙең партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ урындағы совет һәм хужалыҡ ойошмаларынан хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына һәм ғаризаларына ентекле иғтибарлыҡта һәм һиҙгер мөнәсәбәттә булыуҙарын талап итәләр. Шуға күрә лә хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын ҡабул итеү һәм уларҙы тикшереп хәл итеү эштәренең ҡуйылышына яуаплылыҡ Совет исполкомдары председателдәренә йөкмәтелә.

Ләкин Мәләүез район Советы исполкомы (председателе иптәш А. И. Никитин), шулай уҡ күп кенә ауыл Советтәре хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын хәл итеүгә яуапһыҙ, бюрократтарса мөнәсәбәт итәләр. Хеҙмәтсәндәрҙән килгән жалоба һәм ғаризаларҙың хәл ителеүенә тейешле контроль ҡуйылмаған. Улар хөкүмәт тарафынан билдәләнгән сроктарҙа ҡаралмайҙар, хатта күп кенәләре хәрәкәтһеҙ ҡалалар.

Район Советы исполкомына 1948 йылдың 5 апреленә тиклем 60 жалоба килә. Уларҙың 29-ы тикшерелеп, 15-нә ҡәнәғәтләндерерлек яуап ҡайтарыла һәм 14-е кире ҡағыла, а 31-е хәрәкәтһеҙ ятып ҡала. Район Советы етәкселәренең үҙ эштәренә яуапһыҙ ҡараштары арҡаһында Ватан һуғышы инвалидтәре, Ватан һуғышында һәләк булған иптәштәрҙең семьялары һәм колхозсылар үҙҙәренең биргән ғаризаларының яҙмыштарын бер нисә айҙар буйы йәки бөтөнләй белә алмайҙар.

Мәҫәлән, «Тамьян» колхозының члендәре 24 январҙа колхоз председателе Смаковтың законһыҙ хәрәкәт итеүе тураһында район Советына хат яҙалар. Был хат, район Советында 18 көн ятҡанлыҡтан һуң, 11 февралдә ауыл хужалығы бүлегенә ебәрелә, а ауыл хужалығы бүлеге уны бөтөнләйгә иғтибарһыҙ ҡалдыра. Шулай уҡ Молотов исемендәге колхоз члендәренең колхозда «отчет-һайлау йыйылышын ҡайтанан үткәреүҙе» һорап яҙған хаттары ла район Советы исполкомы тарафынан яуапһыҙ ҡалдырыла. Был сигналда колхозсылар колхоз председателенең ауыл хужалығы артеле Уставын тупаҫ рәүештә боҙоуын асыҡ фактылар менән күрһәтәләр.

Район Советы исполкомы был тәңгәлдә ауыл Советтәре өҫтөнән тейешле контролде ойоштормаған. Шул арҡала ҡайһы бер ауыл Советы исполкомдары хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына бөтөнләй иғтибар итмәйҙәр. Мәләүез эшселәр поселкаһы Советына (председателе И. Г. Крылов) 1948 йылдың беренсе кварталында ғына хеҙмәтсәндәрҙән 76 жалоба һәм ғаризалар килә. Ләкин бөгөнгә көнгә тиклем уларҙың береһе лә тикшерелмәгән әле.

Шуны ла әйтергә кәрәк, райондағы ҡайһы бер ойошмалар дөрөҫ хәрәкәт итмәүҙәре, законды боҙоуҙары арҡаһында киң масса араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙыралар, һәм жалобаларҙың күбәйеүенә үҙҙәре сәбәпсе булалар.

Быға миҫал итеп район уполминзагтың үҙ эшенә яуапһыҙ ҡарауын күрһәтергә була. Сөнки 1948 йылда хеҙмәтсәндәрҙән «хөкүмәт һалымдары дөрөҫ үткәрелмәүе» тураһында 187 ғариза килә. Шулар эсенән тикшерелгән 69 ғаризаның бөтәһе лә хөкүмәт тарафынан бирелгән льготалар буйынса төрлө һалымдарҙан ҡотҡарылған кешеләрҙең һалымдар менән облагать ителеүҙәрен раҫланылар. Был фактылар райуполминзаг работниктарының масса араһында насар эшләүҙәрен күрһәтәләр.

Район һәм ауыл Советы исполкомдары, шулай уҡ учреждениеләрҙең етәкселәре йәшәп килгән бындай кәмселектәрҙе ашығыс рәүештә бөтөрөү өсөн, үҙҙәренең практик эштәрен хеҙмәтсәндәрҙең талаптарына яуап бирерлек итеп ҡайтанан ойошторорға тейештәр.

Х. Камалов.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Нью-Йоркта Советтәр Союзына ҡаршы фильмде күрһәтеүгә ҡаршы 10 мең кеше ҡатнашлығында протест демонстрацияһы

НЬЮ-ЙОРК, 12 май. (ТАСС). Фашистик группалар тарафынан ойошторолған провокацияларға, шулай уҡ полиция репрессияларына ҡарамаҫтан, 10 меңдән артыҡ прогрессив америкалы Советтәр Союзына ҡаршы йүнәлтелгән «Тимер шаршау» тигән фильмде күрһәтеүгә протест белдереп, Нью-Йоркта «Рокс» кинотеатры алдында киҫә массовый демонстрацияла ҡатнашты.

«Католиктәр — һуғыш ветерандары» исемле фашизм яҡлы ойошма хулигандары кинотеатр бинаһы алдында провокацион контрдемонстрация яһарға тырышып ҡаранылар һәм фильмде хуплаусы плакаттар күтәреп йөрөнөләр. Йөҙәрләгән полицейскийҙар, шул иҫәптән һыбайлы полицейскийҙар прогрессив демонстрацияға һөжүм иттеләр һәм бер нисә демонстрантты ҡулға алдылар.

Совет Хөкүмәтенең белдереүен боҙоп күрһәтеү

НЬЮ-ЙОРК, 13 май. (ТАСС). АҠШ-тың СССР-ҙағы иләсе Смиттең белдереүенә Совет Хөкүмәтенең биргән яуабының текстын матбуғатҡа биргәндә Госдепартамент тарафынан күп кенә боҙоуҙарға юл ҡуйыу фактын үҙенә иғтибарҙы йәлеп итә.

Мәҫәлән, совет белдереүен көнбайыш биш государство хәрби союзының «икенсе бөтә донъя һуғышында союздаш булыусы государстволарға ҡаршы йүнәлтелеүе ихтимал» тип әйтелгән өлөшөндә, Госдепартамент тарафынан таратылған документта «союздаш булыусы» һүҙе «бөтә» тигән һүҙ менән алыштырылған.

Көнбайыш Европаның биш государствоһының хәрби союзын төҙөүгә ҡарата Совет Хөкүмәтенең белдереүендә, «Англия, Франция һәм Американың бөтә матбуғатында, был союз СССР-ға ҡаршы йүнәлтелгән» тип асыҡтан-асыҡ әйтелә. Америка матбуғатында иғлан ителгән текста Совет Хөкүмәтенең был белдереүе бөтөнләй төшөрөп ҡалдырылған.

Был боҙоп күрһәтеүҙәрҙең характеры үҙенән-үҙе аңлашылып тора.

ҒӘРӘП АРМИЯЛАРЫНЫҢ ПАЛЕСТИНАҒА ИНЕҮҘӘРЕ

БЕЙРУТ, 16 май. (ТАСС). Бөтә газеталарҙың беренсе биттәрендә ҙур баштар аҫтында, «ғәрәп армиялары 15 майға ҡаршы төндә Палестинаға инделәр һәм һуғыш хәрәкәттәре башланылар», тип хәбәр иттеләр.

ПАЛЕСТИНА МАНДАТЫНЫҢ ТАМАМЛАНЫУЫ ТУРАҺЫНДА АНГЛИЯНЫҢ БЕЛДЕРЕҮЕ

ЛОНДОН, 15 май. (ТАСС). Англияның үҙәк информация бюроһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, 13 майҙа Англияның Палестинаға булған мандатының хоҡуҡтары туҡтатылыуы тураһында Англияның колониялар министерствоһының һәм сит ил эштәре министерствоһының берғәләй яһаған белдереүе иғлан ителгән.

Экс-Ан-Прованста компартия бинаһына деголлселәрҙең һөжүм итеүҙәре

ПАРИЖ, 14 май. (ТАСС). «Юманите» газетаһы РПФ (де Голль партияһы) ялсыларының коммунистәр партияһы секцияһы бинаһына яһаған һөжүм итеүҙәре тураһында хәбәр итә. Экс-Ан-Прованс мәрияһында (Буш-Дю-Рон департаменте) РПФ-ның йыйылышынан һуң РПФ-ның 150-ләп кешенән торған төркөмө коммунистәр партияһы секцияһы бинаһына, унда йыйылыш барған ваҡытта, бәреп инергә маташҡан. РПФ молодчиктары отпор алғандан һуң, күҙҙән йәш ағыҙыусы шыйыҡсалар тултырылған шешәләр ырғыта башлағандар. Бәрелеш урынына килгән полиция РПФ-ның ике илевен ҡулға алған. Уларҙың береһе үҙенең ҡара эштәре менән Марселда яҡшы билдәле кеше.

Компартияның Экс-Ан-Прованс секцияһы, һөжүм итеүселәр тураһындағы эш буйынса ентекле тикшереү үткәрелеүен талап итте һәм РПФ-ның ҡоралды отрядтарын таратыуҙы талап итеп протест демонстрацияһы ойошторорға ҡарар итте.

Уоллестең Детройтта яһаған сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 16 май. (ТАСС). Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, президентлеккә өсөнсө партиянан кандидат Генри Уоллес 13 майҙа Детройттағы митингыла сығыш яһаған. Бында 13 мең кеше ҡатнашлыҡ иткән. Уоллес Советтәр Союзының Совет-Америка мөнәсәбәттәре менән бәйләнешле мәсьәләләрҙе тикшерергә риза булыуын Американың официаль кешеләре хуплап ҡаршы алмағандары өсөн һәм, шулай итеп, «халыҡтарҙың тыныслыҡҡа һәм һыуыҡ һуғышты туҡтатырға булған ынтылыштарына һалҡын һыу һипкәндәре өсөн» уларҙы яныҡаң ғәйепләгән. Уоллес шулай уҡ иптәш Сталинға яҙған үҙенең асыҡ хатын уҡыған. Был хатта ул Ҡушма Штаттар менән Советтәр Союзы араһындағы фекер айырымлыҡтарын регулировать итеү программаһын ҡуя.

Уоллес телмәренең төп өлөшө, башлыса, сит ил эштәре буйынса сенат комиссияһы председателе, президент посына дағүәләшеүсе Ванденбергтең эшен ғәйепләүгә арналған. Уоллес: Ванденберг «хәҙерге ваҡытта беҙҙең милли һәм халыҡ-ара политикабыҙҙа хакимлек итеүсе» һәм халыҡ-ара эре капиталистик түгәрәктәрҙең сикләнмәгән власҡа ынтылыштарын ҡәүҙәләндереүсе бөтә философияны үҙендә туплай, тип белдергән.

Уоллес Ванденбергтең сенатор эшен алып барыуҙағы әлеккә эшенә характеристика биргән. Ванденберг «икенсе бөтә донъя һуғышы беҙҙе йотор алдынан агрессияны туҡтатыу буйынса сараларға ҡаршы ҡиммәткә төшөүсе көрәш алып барҙы». Оратор, һуғыштан һуң Ванденберг, Тафта-Хартлиҙең эшселәргә ҡаршы йүнәлтелгән законын ҡабул итеү өсөн тауыш биреп, милли хәрби промышленносте аяҡҡа баҫтырыуҙы яҡланы, һәм Палестинаға йәки «негр халҡының демократик хоҡуҡтарына ҡарата» аҙ ғына ла ҡыҙыҡһыныу күрһәтмәне, тип белдергән.

Уоллес, Ванденбергтең «президент Рузвельтҡа, Гарри Гопкинсҡа һәм Рузвельт хөкүмәте менән бәйләнешле булған бөтә кешеләргә нәфрәт менән ҡарағанлығын» хәтерләйем тип билдәләгән.

Детройтта сығыш яһағандан һуң Уоллес Калифорнияға килде һәм көнбайыш штаттарҙа өс аҙнаға һуҙыласаҡ агитацион эшен башлаған. Калифорнияның дүрт мөһим ҡалаһында билдәләнгән сығыштарынан башҡа Уоллес, шулай уҡ, Орегон, Вашингтон һәм Айдахо штаттарының төрлө ҡалаларында телмәрҙәр менән сығыш яһарға йыйына.

Ҡушма Штаттарҙың еврей государствоһын таныуҙарына ҡарата

ВАШИНГТОН, 16 май. (ТАСС). Аҡ Йорттоң яҡшы белеүсе түгәрәктәре матбуғат вәкилдәренә, Трумэн Палестинаға һәм Яҡын Көнсығыш илдәренә ҡорал ебәреүҙе тыйыуҙы ғәмәлдән сығарыу тураһындағы, шулай уҡ яңы Израиль государствоһы менән дипломатик вәкилдәр алышыу тураһындағы тәҡдимде тикшерә, тип белдерҙеләр. Ҡорал сығарыуҙы тыйыу үҙған йылдың декабрь айында индерелгәйне. Ләкин ҡарар, һис киҫекмәҫтән, ҡабул ителәсәк тигән бер ниндәй ҙә күрһәтмәләр юҡ.

Египет оборона министерствоһының коммюникеһы

КАИР, 15 май. (ТАСС). Египет оборона министерствоһының тәүге ике коммюникеһына ҡарағанда, Египеттең «Спитфайр» маркалы хәрби самолеттары Тель-Авивте һәм Яффаны ике тапҡыр бомбаға тотҡандар һәм «һөҙөмтәлә бик ҙур емертеүҙәр булған».

Египет ғәскәрҙәре, Палестина сиген үтеп, бер нисә ауылды баҫып алғандар. Египет ғәскәрҙәре еврей колонияһы Дантур ҡапитуляция яһауҙан баш тартҡандан һуң уны тар-мар иткәндәр һәм унда йәшәүсе кешеләрҙе үлтергәндәр. Палестиналағы Египет ғәскәрҙәре менән генерал Ахмед Мавави-бей командовать итә.

АҠШ-тың еврей государствоһын таныуы тураһындағы хәбәр Египеттең бөтә матбуғатында ҡаты тәнҡит тыуҙырҙы.

БАШҠОРТОСТАНДА БЕРЕСКЛЕТ

Был төр ағастың—ҡыуаҡлыҡтың халыҡ хужалығында тотҡан әһәмиәте илебеҙҙә 1932 йылда профессор Боссе тарафынан асылды. Ул, бересклет тамырынан алынған ҡайырыла резина промышленносына кәрәкле булған мөһим сырье барлығын билдәләй. 1937 йылда инде Башҡортостан урмандарында ошо ҡиммәтле сырьены массовый әҙерләү башлана. Уның тамырҙарын йыйнау һәм ҡайырыһын алыу, киптереү һәм һаҡлау күп хеҙмәт талап итеүсе ҡатмарлы эш булып тора. Шулай ҙа республикабыҙҙың урман хужалығы ойошмалары государство тарафынан бирелгән заданиелар буйынса промышленность предприятиеларына йыл һайын меңләрсә тонна ҡиммәтле ҡайры әҙерләп бирә.

Башҡортостан бересклете (бородавчатый тип атала) Тыуған илебеҙҙең башҡа өлөшөндәге урмандарында үҫә торған бересклеттарға ҡарағанда үҙенең сифаты яғынан иң яҡшыһы булып иҫәпләнә. Шуға ҡарамаҫтан, республикабыҙҙың лесничестволарында быға тиклем уға «ҡырағай» ҡыуаҡлыҡ итеп ҡарап килделәр. Уны аяҡҡа баҫтырыу, булғандарын һаҡлау һәм артабан үҫтереү, шулай уҡ файҙаланыу мәсьәләләре менән бөтөнләй тип әйтерлек, шөғөлләнмәнеләр.

Промышленностең был сырьеға үҫә барған талабын иҫәпкә алып, хөкүмәтебеҙ бересклетте яһалма рәүештә массовый күләмдә үрсетеү саралары тураһында быйыл махсус ҡарар ҡабул итте. Ошо маҡсат менән Башҡортостанда 1948, 1949 һәм 1950 йылдарҙа өс махсус хужалыҡ ойоштороласаҡ. Хужалыҡты механизациялаштырыу күҙҙә тотола. Хужалыҡтарҙа эшселәр поселкаһы барлыҡҡа киләсәк. Ошондай хужалыҡтың береһе мең гектар майҙанда 1948 йылда Туймазы лесхозында төҙөләсәк.

Ҡалған ике хужалыҡ Баҡалы һәм Бәләбәй лесхоздары территорияһында төҙөү өсөн яраҡлы урындарҙы эҙләнеү эше башланды.

Р. Николаев.

„ДИНАМО" СТАДИОНЫНДА



16 майҙа Өфө ҡалаһы «Динамо» стадионында йәйге спорт сезоны асылыуы ҙур байрам төҫө алды. Стадион майҙаны был көндө түҙемһеҙлек менән көтөп алған тамашасылар менән тулы ине. Аҙ ғына ямғыр һибәләп үткәнлектән, футбол яланы бигерәк тә йәшелләнә төштө. Сәғәт 5. Тамаша башланыуы иғлан ителә. Оркестрҙың гимн уйнауы аҫтында өс чемпион сезондың асылыуын күрһәткән спорт флагын тантаналы рәүештә юғары күтәрә.

Парад башлана. Һоҡланғыс таҙа спортсмендар тигеҙ рәттәр менән үтәләр.

Бына Башҡортостан чемпиондары Баранов, Холкина, Шахматова һәм республиканың башҡа иң яҡшы гимнастары майҙанға сығалар. Улар перекладинала ҡатмарлы хәрәкәттәрҙе иҫ киткес оҫталыҡ менән эшләйҙәр. Уларҙы физкультура техникумы һәм спорт мәктәбе уҡыусылары алмаштыра. Улар ҙур швед эстафетаһы башҡаралар.

Бына хәрбиләштерелгән пожарный эстафета өсөн билдәләнгән икенсе майҙан. Ҡалып «ҡоролмаларҙы» ялҡын ҡаплай. Ут һүндереү кәмәләре менән ҡоралланған пожарниктар, ҙур етеҙлек менән яһалма ҡаршылыҡтарҙы үтеп, шунда уҡ һүндерәләр.

Аҙаҡта «Динамо»-I һәм «Динамо»-II командалары араһында футбол матчы булды. Уйын «Динамо»-I файҙаһына 4:1 иҫәбе менән тамамланды.

Һүрәттә: Футбол матчынан бер күренеш.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Башҡаланың урындағы промышленносе

Өфөнөң урындағы промышленность предприятиелары киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыуҙа ҙур производство уңыштарына өлгәштеләр.

Сталинсе биш йыллыҡтың икенсе йылында киң ҡулланыу тауарҙары етештереү, 1945 йыл менән сағыштырғанда, 32 процентҡа артты, ә ағымдағы йылдың 4 айлыҡ планы 106 процентҡа үтәлде.

Ҡаланың урындағы промышленносы киң ҡулланыу тауарҙары етештереүҙе артабан арттырыу һәм уларҙың ассортиментын киңәйтеү тураһында ныҡышмалы эш алып бара. Тимер карауаттар, сулмаҡтар, алюминийҙан яһалған һауыт-һабалар, күн әйберҙәре, резина, пластмасс һәм галантерея тауарҙары эшләп сығарыу цехтары киңәйтелде. Мәҫәлән, Өфөнөң күн эшләп сығарыу заводында күн тауарҙары эшләү 1,5 миллион дециметрға етә. Тимер карауаттар эшләп сығарыу 1947 йылда 1000 дана булһа, 1948 йылдың аҙағына 7 мең данаға, быйма баҫыу үҙған йыл 2,5 мең пар булһа, быйыл 6 мең парға, күн аяҡ кейемдәре 18 мең пар урынына 20 мең парға еткерелә. Шулай уҡ төрлө мебелдәр, һәм башҡа кәмәләр эшләп сығарыу цехтары ойошторолдо.

Был эштәрҙе тулыһы менән тормошҡа ашырыу өсөн ҡаланың урындағы промышленносе ойоштороу-техник саралар буйынса план төҙөнә. Был планда эшләп сығарыла торған һәр бер тауар буйынса конкрет саралар ҡаралған һәм улар тормошҡа үткәрелә.

З. Ишбулатов.

Йәш баҡсасылар конкурсы дауам итә

ВЛКСМ Үҙәк Комитете һәм «Пионерская правда» газетаһы тарафынан 1947 йылда иң яҡшы баҡсасы исеменә ойошторолған конкурста Башҡортостандан 915 пионер отряды ҡатнашты. Улар 1519 емеш-еләк һәм башҡа ағастар ултырттылар, күп кенә мәктәптәрҙә һәм балалар йорттарында матур баҡсалар яһанылар.

Республикабыҙҙың бер нисә уҡыусыһы Бөтә Союз йәш натуралистәр слетына барҙы, иң яҡшы мәктәптәргә, түңәрәктәргә күсмә байраҡ тапшырылды һәм бүләктәр бирелде.

Конкурс дауам итә. 1948 йылда ла ВЛКСМ Үҙәк Комитеты иң яҡшы йәш баҡсасыларҙы бүләктәр менән билдәләйәсәк.

Күп мәктәптәр, балалар йорттары, түңәрәктәр баҡсалар, урман полосалары ултыртыуға кереш… лар. Бигерәк тә элекке йәш на… ралист, хәҙер Башҡортостан а… хужалығы институты студ… Мансуров Ғизар етәкселек ит… түңәрәк эште яҡшы ойошт… Түңәрәк члендәре меңдән ар… емеш-еләк ҡыуаҡтары, 200 т… еләге һәм башҡаларҙы ултырт… тигән палан буйынса эшлә… Улар 14-се номерлы балалар б… саһында, Мәжит Ғафури ис… йортонда һәм йәш натуралист… станцияһында ағастар ултырт…

Бөтә йәш баҡсасыларҙы б… уй — республиканың башҡа… баҡсалар ҡалаһына әйләндерә…

Е. Кучеро…

Йәш натуралистарҙың … станцияһы агрономы.

Совет шахматистәренең гүзәл еңеүе

16 майҙа донъя шахмат чемпионаты турниренең һуңғы, 25-се туры булып үтте. Керес — Ботвинник һәм Решевский — Эйве осраштылар. Партиялар Керес һәм Решевскийҙең еңеүе менән бөттө.

25 турҙан һуң беренсе урынды Ботвинник (20 мөмкинлектән 14 очко) алды. Ул шахмат буйынса донъя чемпионы исеменә ел… Икенсе урында Смыслов (11 о… Өсөнсө һәм дүртенсе урында… Керес һәм Решевский бүлеше… (10,5-әр очко). Һуңғы урын… Эйве (4 очко). 18 майҙа Совет… Йортонда Колонналар зал… шахмат матч-турнирен тантан… ябыу үткәрелә. (ТАС…

М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт һәм тарих ғилми-тикшеренеү институтында

Башҡортостан М. Ғафури исемендәге тел, әҙәбиәт һәм тарих ғилми-тикшеренеү институты ошо йылдың 18 майында ҡала күләмендә кәңәшмә үткәрә.

Кәңәшмәлә филология фәндәре кандидаты иптәш Әхмеров Ҡасим «Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре» тураһында доклад яһаясаҡ.

Кәңәшмәгә ғилми работниктәр, уҡытыусылар, ваҡытлы матб… һәм издательство работникта… яҙыусылар һәм башҡа иптәш… саҡырылалар.

Кәңәшмә сәғәт 4 тә «Ғалим… йорто» залында башлана.

Институт һәм «Ғалимдәр йорт… ның адресы:

Өфө, К. Маркс урамы, 6…

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

«Башзернотресҡа» даими рәүештә треста эшләү өсөн бухгалтер-ревизор һәм совхозда эшләү өсөн өлкән ветеринар врачтар, баш бухгалтер кәрәк.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 38-се номерлы йорт, телефон номерҙәре: 2—97—68, 2—67—87.

Ағиҙел йылғаһы пароходствоһының эшселәр тәьминәте управлениеһы (УРС) промкомбинаты заказчиктең үҙ материалынан ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар өсөн тышҡы һәм эске кейемдәр тегеүгә, бөтә төр аяҡ кейемдәре һәм галоштар ремонтлауға заказдар ҡабул итә. Заказдар ҡыҫҡа срактарҙа үтәлә.

Ағиҙел йылғаһы пароход… твоһының УРС промкомби… тына ирҙәр һәм ҡатын-ҡыҙ… өсөн тышҡы һәм эске кей… дәр тегеү буйынса квалиф… кациялы тегеүселәр, аяҡ к… йемдәре ремонтлау мастер… ре кәрәк.

Белешмәләр алыу өсөн ад… рес: Өфө ҡалаһы, Ленин ур… мы 129-сы номерлы йор… промкомбинат.

Специалист кәңәштәре

Көнбағышты силос өсөн нисек сәсергә

Башҡортостан колхоздарында һәм совхоздарында быйыл сәсеү майҙаны бик күп арта. Тимәк, оҙаҡ һөрөлмәй ятҡан бик күп майҙандарҙы, бығаса силос өсөн үләне сабыла торған ерҙәрҙе һөрөргә тура киләсәк. Шуға күрә силос өсөн культуралы үҫемлектәр, беренсе нәүбәттә көнбағыш сәсеү майҙанын киңәйтеү бурысы килеп тыуа.

Силос өсөн көнбағыштың үҫентеһе сәсеү күп хеҙмәт һалыуҙы талап итә. Уның рәт араларын һирәкләргә, эшкәртергә, утарға кәрәк. Күпселек колхоздар һәм совхоздар, эшсе көсө етешмәү сәбәпле, силос өсөн сәселгән көнбағыш баҫыуҙарын етерлек тиклем тәрбиәләй алмайҙар һәм шул арҡала унда силос массаһы урожайы күп кәм була.

Башҡортостандың малсылыҡ тәжрибә станцияһы силос өсөн сәселә торған көнбағыштарҙың силослау массаһы алыу буйынса ике йыл һынау үткәрҙе. Уның һөҙөмтәһендә станция силос өсөн көнбағышты вика үләне орлоғо менән ҡушып сәсеүҙе тәҡдим итә.

Көнбағышты вика менән ҡатнаштырып сәскәндә махсус рәүештә сәсеүлекте тәрбиәләү талап ителмәй һәм шул уҡ ваҡытта бындай сәсеүлектәрҙә силос массаһы урожайы юғары була. Көнбағыш менән ҡатнаштырып сәселгән вика үләндәре ҡый үләндәренә үҫергә ирек бирмәйҙәр, ә көнбағышҡа ҡомасаулыҡ итмәйҙәр. Бына шул арҡала унда көнбағыш та, шулай уҡ вика ла уңышлы үҫә ала.

Вика һәм көнбағыш массаһынан яһалған силос сифат яғынан да юғары. Унда аҡһым матдәләре күп була.

Викалы көнбағыш үҫтерелгән ерҙәрҙең тупрағы, тик көнбағыш үҫтерелгән ерҙәгенә ҡарағанда, азот матдәһенә күберәк бай. Бындай баҫыуҙар алдағы йыл өсөн ҡый үләндәренән таҙартылған булалар.

Силос өсөн үҫтерелә торған көнбағыш һәм вика ҡушылтаһын иртә культуралар менән бер үк ваҡытта сәсергә кәрәк. Улар арҡылы-буй ятып сәселәләр. Көнбағышты буйға сәселһә, вика арҡылыға сәселә. Көнбағыш сәскес машинаһында, бер сошник аша, йәғни 26—30 сантиметр аралыҡта, ә вика аралыҡһыҙ сәселә. Орлоҡтар 4—5 сантиметр тәрәнлектә күмдерелергә тейештәр.

Көнбағыш менән вика орлоғо ҡатнаштырып сәскән саҡта бигерәк тә сәсеү нормаһының теүәл үтәлеүенә иғтибар итергә кәрәк. Әгәр ҙә сәсеү нормаһы көнбағыш буйынса артһа, вика үләндәре насар үҫәләр, ә сәсеү нормаһы вика буйынса артһа, көнбағыш насар үҫә.

Һынауҙар буйынса һәр квадрат метр майҙанға 20 дана көнбағыш һәм 120 дана вика орлоғоноң сәселеүе уңышлы табылды. Шулай итеп, бер гектар майҙан ергә 15 килограмм көнбағыш һәм 80 килограмм вика орлоғо сәселә. Әгәр ҙә орлоҡтар бик ваҡ булһалар, уларҙы кәмерәк ауырлыҡта, ә эре булһалар, күберәк ауырлыҡта алырға кәрәк.

Викалы көнбағышты силосҡа һалыу өсөн иң яҡшы ваҡыт—көнбағыштың сәскәләнеү осоро һанала. Ә был осорҙа вика үләндәре инде орлоҡлана башлаған булалар. Уларҙы силос өсөн бесән сапҡыс машина, лобогрейка һәм ҡул салғыһы менән сабып алырға мөмкин. Ә сабылған масса һис киҫекмәҫтән ташылырға һәм силос ямдарына һалынырға тейеш.

С. Умов.

Ижади осрашыу

15 майҙа Өфө ҡалаһы юғары уҡыу йорттары студенттәре менән Башҡортостан искусство работниктарының ижади осрашыу киҫәһе булды. Педагогия институты преподавателе Ж. Лоҡманов «Совет Башҡортостаны искусствоһының үҫешә» тигән темаға доклад һөйләне. Докладтан һуң РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы Х. Ғәлимов, БАССР-ҙың атҡаҙанған артистәре Б. Нуриахмәтова, З. Ильбаева, Ғ. Сәттәров, опера солистәре Ғ. Сөләймәнов, М. Хисмәтуллин, М. Салиҡсҡарова, шағирҙар Ә. Вәли, Ҡ. Даян, Ғ. Әмири, Ғ. Рамазанов, Л. Хәким, Ш. Бикҡол, Н. Нәжми, К. Хәбиб, композитор Т. Кәримов ҡатнашлығында ҙур концерт бирелде.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-43, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00752 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 99
19 май
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Уоллес әфәндеңең Асыҡ хатына И. В. СТАЛИНДЕҢ яуабы. (1-се бит).
Һөрөүҙе бөтә саралар менән тиҙләтергә! Эшкәртелгән һәр бер гектар ерҙе сәсә барырға! (1-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
АГИТАТОРҒА ЯРҘАМҒА. З. Вахитов. — Юғары урожай мастерҙәре нисек уңыштары өсөн Ленин ордене менән награҙланалар (2-се бит).
Ғ. Ибраһимов. — Хеҙмәт батыры (2-се бит).
Израиль государствоһы сит ил эштәре министре һәм СССР Сит ил Эштәре Министре араһында телеграммалар алышыу. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ф. Ғәләмов. — Тәүге партия ойошмаларына етәкселекте көсәйтергә. (3-сө бит).
Г. Баян. — Эшселәр инициативаһына етәкселек итергә. (3-сө бит).
РАЙОН ГАЗЕТАЛАРЫ БИТТӘРЕНӘН. (3-сө бит).
Ҡазир Даян. — Әхмәди аттары. (3-сө бит).
Ф. Мальков. — Алдынғы ҡарыкселек фермаһының тәжрибәһе. (4-се бит).
Беҙҙең республикала. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Уоллес әфәндеңең Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабы

Мин, тыныслыҡты нығытыуҙы, халыҡ-ара хеҙмәттәшлеккә тәртипкә һалыуҙы һәм демократия тәъмин итеүҙе үҙенең маҡсаты итеп тотҡан һуңғы ваҡыттағы политик документтәр араһында, өсөнсө партиянан АҠШ президентлегенә кандидат Уоллес әфәндеңең Асыҡ хаты иң әһәмиәтле документ булып тора, тип уйлайым.

Уоллес әфәндеңең Асыҡ хаты халыҡ-ара хәлде яҡшыртыу теләге тураһында, СССР һәм АҠШ араһындағы фекер айырымлыҡтарын тыныс юл менән регулировать итеү теләге тураһында, шундай регулировать итеү өсөн юлдар эҙләү теләге тураһында ябай декларация ғына тип иҫәпләп булмай, АҠШ хөкүмәтенең 4 майҙа яһаған белдереүенең һәм СССР Хөкүмәтенең 9 майҙа биргән яуабының етешһеҙлеге шунан тора: улар Совет-Америка фекер айырымлыҡтарын регулировать итеү теләген декларациялауҙан уҙмайҙар.

Асыҡ хаттың бик ҙур әһәмиәте шунан тора, ул декларациялау менән генә сикләнмәй, ә артабан китә, алға табан сериоз аҙым яһай һәм СССР менән АҠШ араһындағы фекер айырымлыҡтарын тыныс юл менән регулировать итеү өсөн конкрет программа бирә.

Уоллес әфәндеңең Асыҡ хаты фекер айырымлыҡтарының бөтә мәсьәләләрен дә үҙ эсенә ала, тип әйтеп булмай. Шулай уҡ, Асыҡ хаттың ҡайһы бер формулировкалары һәм комментарийҙәре яҡшыртыуға мохтаж түгелдәр, тип әйтеп булмай. Ләкин хәҙер төп мәсьәлә бында түгел. Төп мәсьәлә, Уоллес әфәндеңең үҙенең хатында асыҡтан-асыҡ һәм намыҫлы рәүештә тыныс юл менән регулировать итеүҙең конкрет программаһын һәм СССР менән АҠШ араһындағы фекер айырымлыҡтарының бөтә төп мәсьәләләре буйынса конкрет тәҡдимдәр бирергә тырышыуында тора.

Был тәҡдимдәр бөтә кешегә билдәле: ҡоралланыуҙарҙы дөйөм ҡыҫҡартыу һәм атом ҡоралын тыйыу тураһында; Германия һәм Япония менән ярашыу договорҙары төҙөү тураһында һәм был илдәрҙән ғәскәрҙәрҙе сығарыу тураһында; Ҡытайҙан һәм Кореянан ғәскәрҙәрҙе сығарыу тураһында; айырым илдәрҙең суверенитетен хөрмәт итеү һәм уларҙың эске эштәренә тығылмау тураһында; Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы илдәрҙә хәрби базалар булдырмау тураһында; бер төрлө лә дискриминацияға юл ҡуйылмаған халыҡ-ара сауҙаны төрлө саралар менән үҫтереү тураһында; һуғыштан зыян күргән илдәргә Берләшкән милләттәр ойошмаһы рамкаларында ярҙам итеү һәм уларҙы экономик яҡтан аяҡҡа баҫтырыу тураһында; бөтә илдәрҙә демократияны яҡлау һәм граждандар хоҡуҡтарын тәъмин итеү тураһында һәм башҡа шундайҙар.

Уоллес әфәндеңең программаһы менән килешергә лә һәм килешмәҫкә лә мөмкин. Ләкин, шуныһы шикһеҙ: тыныслыҡ һәм халыҡтарҙың хеҙмәттәшлеге тураһында хәстәрлек күреүсе бер генә государство деятеле лә был программаны ситләтеп үтә алмай, сөнки ул халыҡтарҙың тыныслыҡты нығытыуға булған ышаныстарын һәм ынтылыштарын сағылдыра һәм ул, һис шикһеҙ, күп миллионлаған «ябай кешеләр» тарафынан яҡланасаҡ.

Мин, СССР һәм АҠШ араһындағы килешеү өсөн нигеҙ булыуы яғынан Уоллес әфәнде программаһын АҠШ хөкүмәтенең хуплаймы, икәнлеген белмәйем. СССР Хөкүмәтенә килгәндә, ул Уоллес әфәнде программаһы бындай килешеү өсөн һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте үҫтереү өсөн яҡшы һәм уңышлы нигеҙ булып хеҙмәт итә алыр ине, тип иҫәпләй, сөнки СССР Хөкүмәте, экономик системаларҙың һәм идеологияларҙың төрлө булыуҙарына ҡарамаҫтан, был системаларҙың бергә йәшәүе һәм СССР менән АҠШ араһындағы фекер айырымлыҡтарын тыныс юл менән регулировать итеү мөмкин булыу ғына түгел, бәлки дөйөм тыныслыҡ интерестарында, һис һүҙһеҙ, кәрәкле, тип иҫәпләй.

Мәскәү. 17 май 1948 йыл

Һөрөүҙе бөтә саралар менән тиҙләтергә! Эшкәртелгән һәр бер гектар ерҙе сәсә барырға!

Трактористәр ярышы

ӘБЙӘН. (Телефон аша). Һаҡмар совхозы баҫыуҙарында һабан ашлыҡ культуралары сәсеүҙе 20 майға тулыһынса тамамлау өсөн ныҡлы көрәш бара.

11 тракторҙың бөтәһе лә тәүлек әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ баҫыу эштәрендә файҙаланыла. Бынан башҡа көн һайын 80 баш мөгөҙлө эре мал менән ер тырматыла.

Трактористәр сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн үҙ-ара ярышалар. Тракторист иптәш Алаев һәр көндө сменаға 8 гектар ер һөрә, 40—50 гектар ашлыҡ сәсә. Һуңғы ике көн эсендә ул 101 гектар майҙанда сәсеү үткәрҙе. Уның менән ярышыусы тракторист Павел Руденко ла яҡшы эшләй.

4-се номерлы ферманың баҫыуында комсомолец-йәштәр бригадаһы члендәренән Тимеров, Мәхмүтов иптәштәр ҙә ике көн эсендә 47-шәр гектар бойҙай сәстеләр.

Алдынғыларҙың эше баҫыуҙа сығарыла торған «боевой листоктарҙа» көн һайын яҡтыртылып барыла.

К. Сафин.

Сәсеүҙе тамамланылар

СТӘРЛЕБАШ. (Телефон аша). Районның колхоздарында ҡиммәтле культура булған бойҙайҙы үҙ ваҡытында яҡшы сифатлы итеп сәсеүгә ҙур иғтибар бирелә. Бөтәһе 8300 гектар бойҙай сәселде. Шуның 1824 гектары сөҙәм ергә урынлаштырылды. «Күндрәк», «Байкал» һәм Сталин исемендәге колхоздар бойҙай сәсеүҙе беренсе булып тамамланылар.

В. Хәликов.

Бойҙай сәсеүҙе һуңғы планға ҡалдыралар

ҠАРИҘЕЛ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районның колхоздары быйыл 1500 гектар майҙанда бойҙай сәсергә тейештәр. Көҙҙән һөрөп ҡалдырылған 1300 гектар әҙер ерҙең булыуы һәм бөтә майҙанға өстәмә орлоҡ әҙерләнеүе был ҡиммәтле культураны бик ҡыҫҡа срокта сәсеүгә тулы мөмкинлек бирә.

Ләкин күпселек колхоздарҙа бойҙайҙы үҙ ваҡытында сәсеүгә тейешле әһәмиәт ителмәй, уны һуңғы планға ҡалдырып килеләр. Мәҫәлән, «9 май» колхозында ба...

Милентьев бригадаһының өлгөлө эше

АСҠАР. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Әбйәлил МТС-ы директоры иптәш Клочков коммунист Михаил Милентьев етәкселек иткән алдынғы трактор бригадаһының эш тәжрибәһен уртаҡлашыу маҡсаты менән кәңәшмә үткәреп, был кәңәшмәлә башҡа трактор бригадаһы бригадирҙарын да саҡырҙы.

Был комсомолец-йәштәр бригадаһы үҙенең өлгөлө эше менән МТС-та ғына түгел, ә бөтә районда маҡтала.

— Беҙ был алдынғы трактор бригадаһының арттағы «Коммунар» колхозына еҙ-ргәйнек, — ти не МТС директоры. — Егеттәр тырышып, намыҫ менән эшләнеләр. Яҙғы сәсеү планын 14 эш көнөндә уңышлы үтәп сыҡтылар. МТС бөтә төр эштәр буйынса ла был колхоз менән төҙөшкән договорҙы үтәне. Матросов исемендәге колхозда 100 гектар ер һөрөлгәндән һуң, бригада, үҙған йылдағы кеүек үк, артта барыусыларға ярҙамға сығасаҡ.

Бригада 15 майҙа яҙғы баҫыу эштәре планын 80 процентҡа үтәп, 720 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Тракторҙар тәүлек әйләнәһенә бер туҡтауһыҙ эшләйҙәр. Алдынғы тракторист иптәш Зимин тәгәрмәсле трактор менән 107 гектар ер һөрөп, 250 хеҙмәт көнө эшләне, 265 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны.

МТС агрономы иптәш Чебаршин шунда уҡ бригадирҙарҙы алдынғы бригаданың эш сифаты менән таныштыра.

— Бына ҡарағыҙ, — ти ул һөрөлгән ерҙе күрһәтеп, — нисдәй тәрән, яҡшы итеп эшкәртелгән. Был бригада ерҙе бары тик предплужникле һабандар менән генә һөрә һәм яҡшы итеп тырмата, был ерҙән быйыл һис шикһеҙ юғары урожай кәтәргә мөмкин.

Унан һуң иптәш Милентьев үҙенең эш методы тураһында һөйләй.

— Һеҙҙең бөтәгеҙ ҙә беҙҙең кеүек эшләй ала. Бының өсөн үҙ эшеңде һөйөргә һәм тапшырылған бурысты үтәүҙә тулы яуаплылыҡ һиҙергә кәрәк, — ти ул, баҫыу эштәрен өҙөүсе трактор бригадаһы бригадирҙары Ғилманов һәм Минһажев иптәштәрҙе ныҡлы тәнҡиткә ала.

Был бик урынлы тәнҡит ине. Иптәш Ғилманов етәкселек иткән бригадала тракторҙар күп ваҡыт тик торалар. Ни бары 16 гектар ашлыҡ сәселгән. Бер генә тракторист тә смена заданиеһын үтәмәй. Машиналарға техник тәрбиә булмағанлыҡтан улар йыш ватылалар, теүгә эш ойошторолмаған. Иптәш Минһажев етәкселек иткән бригадала ла шундай уҡ хәл. Трактор бригадаһы бригадирҙары яҙғы баҫыу эштәрен колхоздар менән төҙөшкән договор буйынса 20 майҙан да һуңға ҡалмай тамамларға, Михаил Милентьев кеүек эшләргә һүҙ бирҙеләр.

М. Хәйҙаров.

Күзәй МТС-ы колхоздар алдында ҙур бурыслы

Күзәй МТС-ы быйыл 31 мең 500 гектар ер эшкәртеү йөкләмәһен алып, районның 30 колхозы менән договор төҙөшкәйне.

Директор вазифаһын үтәүсе өлкән механик иптәш Сәетов та, директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Тимербулатов та колхозсыларҙы договорҙы үҙ ваҡытында үтәп сығыуға ышандырҙылар, вәғәҙәләр бирҙеләр.

— Бер генә машина ла быйыл тик ултырмаясаҡ, ремонт яҡшы үткәрелде, — тинеләр улар.

Ләкин улар тракторҙарҙы колхоздарға оҙатыу менән договор тураһында онотолар, механизаторҙарҙың эшен үҙ ағышына тапшырҙылар.

Күпселек тракторҙар, ремонт насар үткәрелгәнлектән, баҫыуға сығыу менән ватылдылар. Володарский исемендәге колхозға ебәрелгән трактор 10 майға тиклем ватыҡ килеш баҫыуҙа ултырҙы. Трактор бригадаһы бригадиры ...

колхоздарында ла машиналар бик насар файҙаланыла.

Сәсеү графигы икенсе һәм өсөнсө биш көнлектә лә өҙөлдө. 46 трактор менән һәр көндө 600 гектар урынына, ни бары 190 — 200 гектар ер эшкәртелә. МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 2 мең гектарҙан артыҡ туңға һөрөлгән ер бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, бары 264 гектар майҙанда иртә культуралар сәселгән.

Трактор бригадаларында 17 һабан етешмәй, бөтә МТС-та предплужникле 4 кенә һабан бар. Хатта улар ҙа файҙаланылмай. Сталин исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе трактор бригадаһында предплужниктәр теләһә ҡайҙа ташланған. Бригадир иптәш Сәмиғуллин улар менән эшләүҙе артыҡ мәшәҡәт, тип иҫәпләй. МТС-тың өлкән агрономы иптәш Ғәликәева агротехниканы боҙоусыларға килешеп ҡарай.

Механизаторҙар ...

Звеноларға иғтибар итмәйҙәр

Быйыл районда 653 звено ойошторолдо. Уларҙың яртыһы орлоҡсолоҡ звенолары. Ләкин районда уларға тейешле баһа бирелмәй.

— Беҙ звеноны миңә кешеләрҙе эшкә сығарыуҙа ярҙам итер өсөн төҙөнөк, — ти Ворошилов исемендәге колхоздың баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Низамов. Бынын бригадирҙың шаярыу һүҙе тип ҡарап булмай, әлбиттә. Сөнки ул ысынлап та звеноводтарҙы тик шул маҡсат өсөн генә файҙалана.

Был осраҡлы хәл түгел. Колхоздарҙа бындай етәкселәр күп кенә. Мәҫәлән, Киров исемендәге колхоздың председателе иптәш Насибуллинде лә звеноларҙың ролдәрен аңламай, тип әйтеп булмай. Ә шулай булһа ла, ул яҙғы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк звеноларҙы онотҡан. Бында быйыл орлоҡ участкаһында 60 гектар майҙанда ашлыҡ сәселгән. Унда ерҙе кем һөргән, ашлыҡты кем сәскән? Быны орлоҡсолоҡ звенолары етәкселәре Закиров та, Хәлканова ла, шулай уҡ звеноларҙың члендәре лә белмәйҙәр. «Башҡортостан» колхозында ла (председателе иптәш Ситдиков) орлоҡ участкаһындағы бойҙайҙы орлоҡсолоҡ звеноһының (етәксеһе иптәш К. Әхмәтшин) ҡатнашлығынан тыш сәскәндәр. Ер бер эҙҙән генә тырматылған, сәсеү ҙә сифатһыҙ үткәрелгән.

Хеҙмәттә звено системаһын боҙоу фактылары шулай уҡ «Ярыш», «Трактор», «ОДН», «Ленин юлы» һәм башҡа колхоздарҙа ла бар. Шундай сәбәптәр арҡаһында хәҙер был колхоздарҙа звенолар тарҡалғандар.

Күпселек колхоздарҙа звенолар формаль рәүештә, тик ҡатын-ҡыҙҙарҙан ғына, бөтә эш комплексен иҫәпкә алмайынса ойошторолғандар. Эш барышында ла звенолар составына ирҙәр беркетелмәй.

Баҫыу эшендә звенолар системаһының боҙолоуы арҡаһында хеҙмәт етештереүсәнлегә түбән, сифатҡа иғтибар ителмәй. «Ярҙам» һәм Киров исемендәге колхоздарҙа һабансылар көненә ни бары 0,23—0,30 гектар ғына ер һөрәләр.

Хеҙмәт ойоштороуҙа звено системаһын баһаламау, индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаны ҡулланмау һөҙөмтәһендә колхоздарҙа баҫыу эштәре түбән темп менән баралар. Район һәм колхоз етәкселәренән был хаталарҙы ашығыс бөтереү талап ителә.

К. Әхмәтов.

Саҡмағош районы.

Ярҙамсы хужалыҡтарҙа сәсеү эше

Ишембайҙағы «Өс ҡайын» промартеле (председателе иптәш Ғәйфуллин) үҙенең ярҙамсы хужалығында бөртөклө ашлыҡ культураларын сәсеүҙе тамамланы.

Иптәш Ҡайпҡулов звеноһы айырыуса яҡшы эшләй. Сәсеүселәр Г. Ғүмеров, Р. Смаков иптәштәр көндәлек нормаларын 120 — 125, тырматыусылар Н. Сәлимов, И. Садиков 110 процентҡа үтәйҙәр. Һөрөүселәрҙән С. Мостафин, Ә Кабиров иптәштәр яҡшы эшләйҙәр. Миңнебикә Манаева етәкселегендә баҡсасылыҡ звеноһы парник хужалығын әҙерләп, бөтә йәшелсәләрҙе үҙ ваҡытында ултыртыуҙы тәъмин итте. Йәшелсәләрҙең сығышы яҡшы.

Ҡала Советының ярҙамсы хужалығы ла (директоры иптәш Козадаев) иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы. Ҡаланың предприятиеләрҙең һәм промартелдәрҙең ярҙамсы хужалыҡтарында сәсеү эштәре ҡыҙыу алып барыла.

Ярҙамсы хужалыҡтарҙағы эшселәрҙе культура яғынан хеҙмәтләндереү өсөн һөнәрселек училищеһе уҡыусылары көсө менән 20 кешенән агитбригада ойошторолған.

Х. Дәүләтшин.

Экзамендәрҙе уңышлы үткәрергә

Иртәгә республикабыҙ мәктәптәрендә экзамендәр һәм һынауҙар башлана. Был — уҡыусылар, уҡытыусылар һәм мәғариф органдарының йыл буйына дауам иткән көсөргәнешле хеҙмәтенә тикшереү яһауҙың иң яуаплы осоро һәм ул Тыуған илебеҙ тормошонда ҙур ваҡиға.

Быйыл республикабыҙҙа 5.185 мәктәп эшләй. Уларҙа 544.345 бала уҡый. Тамамлап сығыу экза...

...тәһе лә экзамендәр барышында бик мөһим саралар.

Балаларҙан экзамендәр һәм һынауҙар ҡабул итеү тыныс, үҙ-ара ярҙам, дуҫлыҡ обстановкаһында үтһен. Экзамен комиссияларының эште дөрөҫ ойоштороуҙары уҡыусыларға үҙ көстәренә һәм белемдәренә ышаныс тыуҙырыр, уларға экзамен өҫтәле эргәһенә килеп тәрән һәм дөрөҫ яуап биреүгә булышлыҡ итер. Дүртенсе ...

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

Ростов өлкәһе, Азов районының Рогожкинск балыҡсылыҡ колхозында балыҡ тотоу уңышлы бара. Бында квартал планы 191 процентҡа үтәлде.

Һүрәттә: Е. Р. Молдованов бригадаһы тотҡан аҡ балыҡты колхоз базаһына илтеү өсөн кәмәгә тейәй.

Б. Пушкин һәм А. Штейников фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Һирәк осрай торған операция

Ауырыу иптәш Н. Сейнде Ростовтан Мәскәүгә килтерҙеләр. Һуғыш ваҡытында уның күкрәге яраланғайны. Госпиталдән сыҡҡас, иптәш Сейн демобилизацияланып, шахтер булып эшләй башлай. Бер нисә тиклем ваҡыттан һуң ул хәлһеҙләнә, уның бер күҙе һуҡырая. Һул ҡулы шул тиклем ныҡ шешә, хатта уң ҡулыҡа ҡарағанда 4 тапҡырға йыуаная.

Профессор Петровский, ауырыуҙы үлемдән һаҡлап алып ҡалыу өсөн, ҡатмарлы операция яһарға була. Ул ауырыуҙың күкрәк клеткаһын аса, йөрәгән ялағаслап дыра, аорта бәгеләндә тауыҡ йомортҡаһы ҙурлығында ҡан ҡапсығы барлығын күрә. Хирург уның ҡанын сығарып ҡапсыҡты тегеп ҡуя.

Бер нисә көн үткәндән һуң ауырыу терелә башлай, ике аҙнанан һуң ул, йыл ярым ваҡыт эсендә беренсе тапҡыр, аяғына баҫа. Күҙе күрә башлай, ҡулдың шеше лә бөтә. Иптәш Сейн тәҙәлеп үҙенең тыуған ҡалаһына ҡайтып китә.

Профессор Петровский тарафынан яһалған операция бик һирәк осрай торған операцияларға инә. Бөтә донъя хирургия практикаһы аорта бәгеләнә бындай операция яһауҙы белмәй.

(ТАСС).

Иген ҡабул итеүгә әҙерләнәләр

ХЕРСОН. (ТАСС). Игән тапшырыу пункттарында элеваторҙар, келәттәр төҙәлә һәм ремонтлана. Үлсәү хужалығы тәртипкә килтерелә, лаборанттар һәм үлсәүселәр әҙерләнә. Унарлаған мең тонна игән һыйҙырышлы складтар һәм элеваторҙар аяҡҡа баҫтырыласаҡ һәм төҙәләсәк.

Днепр буйҙарында тимер юлдар буйынса игән ҡабул итеү өсөн күп-кенә яңы пункттар барлыҡҡа килде. Геническ районында ҙур ике элеватор аяҡҡа баҫтырыла. Игән буштатыу буйынса булған бөтә процестар механизациялаштырылды. Игән тейәлгән 6 автомашинаны бер үк ваҡытта ҡабул итеүсе ҙур үлсәүҙәр аяҡҡа баҫтырылды.

Яңы урожай игәнен ҡабул итеү өсөн төрлө ойошмаларҙың склад бинаһары өҫтәмә рәүештә файҙаланыласаҡ.

Багратион һәм Барклай-де-Толлиҙең бронзанан эшләнгән бюстәре

Советтәр Дворесе төҙәләшә управлениеһенең эксперименталь-художество мастерскойҙары 1812 йылғы Ватан һуғышының рус полководецтәре Багратион һәм Барклай — де-Толлиға бронзанан бюст ҡойоуҙы тамамланылар. Бюстәрҙең бейеклеге 2 метр самаһы. Улар Бородино яланына, тарихи һуғыш ваҡытында Рәсәйҙең батареяһы торған урынға, һалынасаҡ һәйкәлдәр өсөн билдәләнгәндәр.

Скульптураларҙың авторы Белоруҫ ССР-ының халыҡ художнигы, Сталин премияһы лауреаты З. И. Азгур.

(ТАСС).

Алтай тауҙарында тоннель

БАРНАУЫЛ. (ТАСС). Көньяҡ Себер магистрален төҙәүселәр Саян тауҙары аша тоннель ҡазыу эшен башланылар. Бында тауҙың ике яғынан да, шартлатыу эшулы менән, 50 мең кубометрҙан артыҡ тау тоҡомдары ҡаҙып сығарылды.

Был Алтай тауҙарында беренсе тоннель буласаҡ.

Агитаторға ярҙамға

Юғары урожай мастерҙәре ниндәй уңыштар өсөн Ленин ордене менән наградланалар

Үткән йыл социалистик ауыл хужалығы алдынғылары ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Республикабыҙҙың юғары урожай мастерҙәренән 53 кеше Ленин ордене менән наградланды. Быйыл СССР Верховный Советы Президиумы юғары урожай мастерҙарен наградлау өсөн үткән йылға ҡарағанда юғарыраҡ күрһәткестәргә өлгәшеү бурысын ҡуйҙы.

Ауыл хужалығы алдынғылары Ленин ордене менән наградланыу өсөн юғары урожай алыуҙа ниндәй уңыштарға өлгәшергә тейештәр?

Башҡортостан шарттарында колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларындағы звеноводтары Ленин ордене менән наградланыу өсөн түбәндәге күләмдә урожай алырға бурыслылар: бойҙай һәм арыш культуралары үҫтереүсе звеноводтар 20 гектар майҙандың һәр гектарынан 23 центнер, шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүселәр — 3 гектарҙан 450-шәр центнер, көнбағыш үҫтереүселәр — 10 гектарҙан 17-шәр центнер, клевер, люцерна, тимофеевка үҫтереүселәр 5 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 4,2 центнер клевер йәки 4,5 центнер люцерна йәки 5,2 центнер тимофеевка орлоғо урожайын үҫтереп алырға тейештәр.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙарына шул уҡ күләмдәге урожайҙы түбәндәге майҙандан алғандары өсөн Ленин ордене бирелә: бойҙай һәм арыш (бергә) — 60 гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 10 гектар, көнбағыш — 30 гектар, клевер—10 гектар, люцерна — 15 гектар, тимофеевка — 10 гектар.

Колхоздарҙың председателдәре, агрономдары, совхоз бүлексәләренең управляющийҙары, агрономдары, механиктәре, трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористтәре Ленин ордене менән наградланыу өсөн шул уҡ күләмдәге урожайҙы 150 гектар бойҙай һәм арыш (бергә) майҙанынан, 20 гектар шәкәр сөгөлдөрө майҙанынан, 60 гектар көнбағыш майҙанынан, 20 гектар клевер йәки тимофеевка майҙанынан һәм 30 гектар люцерна майҙанынан алырға тейештәр.

Совхоздарҙың директорҙары, өлкән агрономдары һәм өлкән механиктәре 300 гектар бойҙай һәм арыш (бергә) майҙанының һәр гектарынан 23 центнер урожай алғандары өсөн Ленин ордене менән наградланалар. Улар шәкәр сөгөлдөрөнән, көнбағыштан һәм үләндәрҙән Указда күрһәтелгән күләмдә урожай алған өсөн дә Ленин ордене менән наградланалар. Бының өсөн 50 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 450 центнер шәкәр сөгөлдөрө, 100 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 17-шәр центнер көнбағыш, 60 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 4,2 центнер клевер орлоғо йәки 5,2 центнер тимофеевка, 75 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 4,5 центнер люцерна орлоғо алыу талап ителә.

Ленин ордене алыуға өлгәшеү ...

өсөн МТС-тарҙың трактор бригадалары бригадирҙәре һәм трактористтәре үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 250 гектар бойҙай һәм арыш майҙанының һәр гектарынан 20 центнер йәки 65 гектар шәкәр сөгөлдөрө майҙанының һәр гектарынан 310 центнер йәки 130 гектар көнбағыш майҙанының һәр гектарынан 16 центнер урожай алырға, 50 гектар клевер сәсеүлегенең һәр гектарынан 3,5 центнер орлоҡ, 75 гектар люцерна сәсеүлегенең һәр гектарынан 4 центнер орлоҡ, 50 гектар тимофеевка сәсеүлегенең һәр гектарынан 4 центнер орлоҡ алырға бурыслылар. Ә МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктәре шул уҡ күләмдәге урожайҙы түбәндәге майҙандан алырға тейештәр: бойҙай һәм арыш (бергә) — 500 гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 130 гектар, көнбағыш — 200 гектар, клевер — 100 гектар, люцерна — 150 гектар, тимофеевка — 100 гектар.

МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 1000 гектар бойҙай һәм арыш (бергә) майҙанының һәр бер гектарынан 18 центнер урожай алыуға өлгәшкәндәре өсөн МТС-тарҙың директорҙары, өлкән механиктәре һәм өлкән агрономдары Ленин ордене менән наградланалар. Улар был бөйөк наградаһы алыу өсөн йәки 300 гектар шәкәр сөгөлдөрө майҙанының һәр бер гектарынан 260 центнер урожай алыуға, йәки 400 гектар көнбағыш сәсеүлегенең һәр бер гектарынан 13 центнер урожай алыуға, үлән орлоҡтарынан: 200 гектар клеверҙан 3-әр центнер, 300 гектар люцернанан 3,5-әр центнер, 200 гектар тимофеевканан 3,4-әр центнер урожай алыуға өлгәшергә бурыслылар.

Әгәр ҙә колхозда бойҙай һәм арыш майҙаны бәләкәй икән, ләкин ул 40 гектарҙан да кәм булмаһа, колхоз Указда күрһәтелгән миҡдарҙа урожай алһа, уның председателе Ленин ордене менән наградланыуға тапшырыла.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың работниктәрен Ленин ордене менән наградлауға тапшырыу өсөн колхоз һәм совхоз үҙенең бөтә сәсеү майҙанында планда күрһәтелгән кимәлдән юғарыраҡ урожай алырға тейеш.

Звеноводты наградлау өсөн баҫыусылыҡ звеноһы үҙ сәсеүлегенең ҡалған майҙанында, бөтә культуралар буйынса ла урожай алыу планын арттырып үтәй. Баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирен наградлау өсөн ...

майҙанында бөтә культураларҙан да планда күрһәтелгәнгә ҡарағанда күберәк урожай алыу талап ителә.

Колхоз ауыл хужалығы продукцияларының бөтә төрө буйынса мәжбүри поставканы, контрактацияны, МТС эше өсөн натуралата түләүҙе үтәгән, а совхоз государствоға ауыл хужалығы продукцияһы тапшырыу планын үтәгән булырға тейеш. Колхоз һәм совхоз алдағы йылда сәсеү өсөн бөтә культуралар буйынса ла үҙен орлоҡ менән тәьмин иткән булһын.

Совхоздарҙың трактор бригадалары трактор эштәренең планын үтәгән булырға, ә трактористе наградлау өсөн — ул бригададағы уртаса эшләп сығарыуға ҡарағанда 25 процентҡа артығыраҡ эшләргә тейеш.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың яҡшы эш өлгөләре күрһәткән работниктәре, урожайҙы күтәреүҙә актив ҡатнашыуына ҡарап ордендәр һәм медалдәр менән наградланалар.

МТС работниктәрен наградлау өсөн түбәндәге шарттар үтәлгән булырға тейеш: МТС хеҙмәтләндерә торған колхоздарҙа бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм ошо Указда күрһәтелгән культуралар буйынса урожай алыу планын үтәргә, баҫыусылыҡ продукциялары буйынса мәжбүри поставкаларҙы, контрактацияны һәм МТС эше өсөн натуралата түләүҙе тулыһынса үтәргә, киләһе йыл өсөн орлоҡ менән тулыһынса тәьмин итергә кәрәк.

МТС-тың участкалары, бригадалары трактор эштәренең планын үтәгән булырға тейеш. Трактористе наградлау өсөн уның бригадала уртаса эш күрһәткесенә ҡарағанда 25 процентҡа күберәк ер эшкәрткән булыуы кәрәк.

МТС-тың эштә айырыуса өлгө күрһәткән работниктәре, юғары урожай өсөн көрәштә ҡатнашыуҙарына ҡарап, ордендәр һәм медалдәр менән наградланалар.

МТС һәм совхоз комбайнерҙәре Ленин ордене алыу өсөн 25 эш көнөндә «Коммунар» комбайны һәм «С—4» маркалы үҙе йөрөй торған комбайн менән 5,3 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 700 центнер майлы культура урожайын; «Сталинец— 1» һәм «Сталинец —6» комбайны менән 7,2 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 800 центнер майлы культуралар урожайын һуғып алырға бурыслы. Комбайнер урожай йыйнауҙы яҡшы сифатлы итеп үткәрергә, комбайнды яҡшы һаҡларға тейеш. Унан һуң, ул яҙ көнө тракторист булып эшләп, йыллыҡ эш нормаһының 20 процентен үтәргә, Указда күрһәтелгән культураларҙан планда билдәләнгән урожайҙы алырға бурыслы.

Республикабыҙҙың ауыл хужалығы эшсәндәре был күрһәткестәрҙе үтәү, юғары награда — Ленин ордене алыу өсөн фидакәр көрәшәсәктәр.

Э. В.

Израиль государствоһы сит ил эштәре министры һәм СССР Сит ил Эштәре Министре араһында телеграммалар алышыу

Сит ил Эштәре Министренә

Мәскәү

Түбәндәгеләрҙе Һеҙгә белдереү хөрмәтенә эйәмен һәм уларҙы Һеҙҙең Хөкүмәтегеҙ иғтибарына еткереүегеҙҙе һорайым: кисә, 14 майҙа, Британия мандаты тамамланыу айҡанлы Палестина еврейҙәренән һайланған вәкаләтле ойошмаларҙың члендарынан торған Еврей Государствоһының Милли Советы йыйналды, һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының 1947 йыл 29 ноябрь ҡарары нигеҙендә Палестинала бойондороҡһоҙ еврей государствоһын төҙөүҙе иғлан итте. Ул Израиль государствоһы тип аталасаҡ. Совет, тейешле тәртиптә һайланған государство органдары төҙәлгәнгә тиклем, 1948 йылдың 1 октябренән дә һуңламай Учредительный Собрание тарафынан эшләнәсәк конституцияға ярашлы рәүештә, ошо Совет государствоһының ваҡытлы советы сифатында хәрәкәт итәсәк һәм уның башҡарма органы Израиль государствоһының ваҡытлы хөкүмәте булып торасаҡ, тип ҡарар итте. Совет, Израиль государствоһы бөтә илдәрҙең еврейҙәрен индереү өсөн асыҡ буласаҡ, ул илдәге бөтә кешеләрҙең бәхете өсөн илдең үҫешенә ярҙам итәсәк, ул азатлыҡ, ғәҙеллек һәм тыныслыҡ принциптәренә нигеҙләнәсәк, ул расаһына, диненә йәки енесенә ҡарамаҫтан, бөтә граждандарҙың тулы социаль һәм политик тиңлеген яҡлаясаҡ, ул выждандың, диндең, белемдең, культураның һәм телдең тулы ирклеген гарантиялаясаҡ, ул дини әйберҙәрҙең һәм бөтә диндәрҙең изге урындарының мөҡәтдәслеген һәм тейелмәҫлеген һаҡлаясаҡ, һәм ул Берләшкән милләттәр Уставы принциптәрен ерәнә еткерәсәк, тип белдерҙе. Совет шулай уҡ, Израиль государствоһы Генеральный Ассамблеяның 1947 йыл 29 ноябрь ҡарарын тормошҡа ашырыуҙа Берләшкән милләттәрҙең органдары һәм вәкилдәре менән хеҙмәттәшлек итергә әҙер һәм ул бөтә Палестина өсөн экономик союздың эффектлеген тәьмин итеү өсөн кәрәк булған бөтә нәмәне эшләйәсәк, тип белдерҙе.

Совет Израиль государствоһында йәшәүсе бөтә гәрәптәрҙе ының тормошҡа кире ҡайтырға саҡырҙы һәм шулай итеп, уларҙы айырылғыһыҙ һәм тигеҙ граждандыҡ хоҡуҡтар нигеҙендә, был государствоның ваҡытлы һәм даими хөкүмәт органдарында тейешле вәкәләттәр нигеҙендә ҡатнашып, был государствоның үҫешенә ярҙам итергә саҡырып мөрәжәғәт итте. Совет шулай уҡ бөтә күрше илдәргә һәм уларҙың халыҡтарына тыныслыҡ тәҡдим итә һәм уларҙы дөйөм бәхет өсөн Израиль государствоһы менән хеҙмәттәшлек итергә саҡыра.

Израилдең ваҡытлы хөкүмәте исеменән мин Совет Социалистик Республикалар Союзы Хөкүмәтенән Израиль государствоһын һәм уның ваҡытлы хөкүмәтен официаль рәүештә таныуын һорайым. Мин, яҡын киләсәк ваҡытта Израиль государствоһы танылыасаҡ тип ышанырға батырсылыҡ итәм һәм мин, был таныу бер яҡтан, Советтәр Союзы һәм уның халыҡтары менән, икенсе яҡтан Израиль государствоһы һәм Палестинаның еврей халҡы менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытасаҡ, һәм был таныу ғөмүмән халыҡ-ара мөнәсәбәттәрҙә тыныслыҡ һәм ғәҙеллек эшенә хеҙмәт итәсәк, тип ышанам.

Ошо уңай менән файҙаланып, Һеҙгә тәрән рәхмәт тойғоһон һәм Палестиналағы еврей халҡының мәрхәмәт тойғоһон белдерәм. Берләшкән милләттәр ойошмаһында СССР делегацияһы Палестинала суверенный һәм бойондороҡһоҙ еврей государствоһын төҙөү файҙаһына юнәлтелгән ныҡлы позиция алғаны өсөн, бөтә ҡыйынлыҡтарға ҡарамаҫтан, уның ошо хәлде ныҡлы яҡлауы өсөн, Европалағы еврей халҡының фашистик палачтар табаны аҫтында ғазап сигеүҙәрен асын күңелдән аңлағаны өсөн һәм, Палестина еврейҙәре суверенитетҡа һәм бойондороҡһоҙлоҡҡа хоҡуҡлы милләт булып торалар тигән принципте яҡлағаны өсөн был тойғоно шулай уҡ бөтә донъя еврейҙәре лә уртаҡлашалар.

Израилдең ваҡытлы Хөкүмәте исеменән **Моше Шерток**, сит ил эштәре министры.

Израилдең ваҡытлы хөкүмәте сит ил эштәре министры

Моше Шертокка

Тель Авив

Һеҙҙең 15 майҙа биргән телеграммағыҙҙы алыуымды раҫлайым, Һеҙ унда Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының 1947 йыл 29 ноябрь ҡарары нигеҙендә Палестинала бойондороҡһоҙ Израиль государствоһы төҙәлеүе тураһында СССР Хөкүмәте иғтибарына еткерәһегеҙ һәм Израиль государствоһын һәм уның ваҡытлы хөкүмәтен Совет Социалистик Республикалар Союзының таныуын һорап мөрәжәғәт итәһегеҙ.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Хөкүмәте Израиль государствоһын һәм уның ваҡытлы хөкүмәтен официаль рәүештә таныу тураһында ҡарар ҡабул иткәнлеген ошоноң менән хәбәр итәм.

Совет Хөкүмәте, еврей халҡының үҙенең суверенный государствоһын төҙөүе Палестинала һәм Яҡын Көнсығышта тыныслыҡты һәм именлекте нығытыу эшенә хеҙмәт итер, тип ышана һәм СССР менән Израиль государствоһы араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренең уңышлы рәүештә үҫәсәгенә ышаныуын белдерә.

В. Молотов.
СССР-ҙың Сит ил Эштәре ...

ПРИНОСИМ ИЗВИНЕНИЯ
ЗА ОТСУТСТВИЕ ИНФОРМАЦИИ

Партия тормошо

Тәүге партия ойошмаларына етәкселекте көсәйтергә

Партияның Өфө район конференцияһы райкомдың тәүге ойошмаларға етәкселеге йомшаҡ булыуын һәм ярҙам күрһәтмәүен ҡаты ғәйепләгәйне. Конференциянан һуң әҙ ай ваҡыт үтеп китте. Ләкин райкомдың тәүге партия ойошмаларына етәкселек итеү стилендә бер ҙә күренерлек үҙгәреш булғаны юҡ әле. Күрһәтелгән етешһеҙлектәр бик яй бөтөрөлә. Райкомдың етәксе работниктәре һаман да өҫтән эшләйҙәр, тәүге партия ойошмаларында булып, уларға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Мәҫәлән, Дмитриевка бәртәкле ашлыҡ совхозында 1946 йылдың июнь айынан бирле райкомдың бер генә инструкторы ла, бер генә пропагандисы ла булғаны юҡ. Райком был ойошмалағы хәлде белмәй. Ә бында эш яҡшынан түгел. Партия йыйылыштары ваҡытында үткәрелмәй. Коммунистарға партия поручениелары бирелмәү генә түгел, хатта улар партия поручениеһының нимә икәнен дә белмәйҙәр.

— Партияның ниндәй поручениеһен үтәйһегеҙ? — тигән һорауға, А. К. Геньев һәм Р. Т. Макаров иптәштәр:

— Беҙгә производствола яҡшы эшләргә ҡушылды, — тип яуап бирәләр.

Партия члендәре һәм кандидаттары үҙҙәренең политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә эшләмәйҙәр. Партия ойошмаһының секретаре Львов һәм уның урынбаҫары Маковецкий иптәштәр коммунистарҙың уҡыуына контроль яһамайҙар. Һуңғы ике йыл эсендә политик темала ни бары бер тапҡыр ғына доклад үткәрелгән. Ә лекция һәм консультациялар булғаны ла юҡ.

Совхоздың эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре араһында политик-массовый эш алып барылмай.

Өфө райкомының работниктәре тәүге ойошмаларҙа булған саҡтарында ла партия эше менән өҫтән-өҫтән генә шөғөлләнәләр. Райком инструкторы иптәш Киреев февраль—март айҙарында Цюрупа исемендәге совхоздың, Буденный исемендәге колхоздың һәм Булғаҡ ауыл Советенең партия ойошмаларында булып киткән. Ләкин уларға бер төрлө лә ярҙам күрһәтмәгән, етешһеҙлектәрҙе асмаған. Ә был ойошмаларҙа партия эшенең торошо һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Буденный исемендәге колхоз партия ойошмаһында йыйылыштар һирәк, әҙерлекһеҙ һәм һис бер төрлө системаһыҙ үткәрелә, бер йыйылышта 4—5-әр мәсьәлә ҡарала, улар буйынса конкрет ҡарар ҡабул ителмәй. Мәҫәлән, 19 мартта булған йыйылышта яҙғы сәсеүгә әҙерлектең барышы тураһында бригадирҙарҙың, малсылыҡ эшенең торошо тураһында ферма мөдиренең отчеттары тыңланылған, партияның район конференцияһы йомғаҡтары һәм башҡа бик күп мәсьәләләр ҡаралған. Ләкин уларҙың береһе генә лә ентекләп тикшерелмәгән һәм конкрет ҡарар ҡабул ителмәгән.

Булғаҡ ауыл Советы эргәһендәге территориаль партия ойошмаһының 5 февралдә булып үткән йыйылышында май заводы директоры иптәш Поляковтың отчеты тыңланыла. Ләкин уның буйынса ҡарар сығарылмай. Партияның был тәүге ойошмаларында членлек взностары тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының инструкцияһы боҙола. Әгәр райком инструкторы үҙендә яуаплылыҡ һиҙһә, был етешһеҙлектәрҙе асыр һәм уларҙы бөтөрөү өсөн практик ярҙам күрһәтер ине.

Тәүге партия ойошмаларына етәкселек итеүҙәге бындай ярамһыҙ методтарҙы бөтөрөргә ваҡыт. Райком үҙенең эшен конференция күрһәтмәләре нигеҙендә тиҙ ваҡыт эсендә үҙгәртеп ҡорорға, тәүге партия ойошмаларына етәкселекте ҡырҡа яҡшыртырға тейеш. Партия райкомының работниктәре урындарҙа йыш булырға, партия эшенең торошон нығлап өйрәнергә һәм булған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн практик ярҙам итергә бурыслылар.

Ф. Ғәлләмов,
ВКП(б) Өлкә Комитетының инструкторы.

Һүрәттә: Өфө нефть эшкәртеү заводының алдынғы кешеләре. (Һулдан уңға) өлкән оператор Г. Х. Бикмитов, установка начальниктәре А. А. Закиров һәм М. А. Ямалаев иптәштәр.

Л. Яҡубов фотоһы.

Эшселәр инициативаһына етәкселек итергә

Өфө паровоздар ремонтлау заводы ҡаланың ҙур предприятиеләренән береһе иҫәпләнә. Унда, башҡа промышленность предприятиеләрендәге кеүек үк, производство планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн бик ҙур мөмкинлектәр бар. Ошо йылдың беренсе кварталында завод был мөмкинлектәрҙе файҙаланыу арҡаһында ҡайһы бер ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшә алды. Тотошо менән алғанда завод беренсе кварталда продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 3,2 процентҡа кәметте.

Цехтарҙың хужалыҡ иҫәбенә күсеү юнәлешендә яһаған тәүге аҙымдары заводтың государствонан алына торған дотацияһын кәметә бара. Завод ошо йылдың I кварталында дотация күләмен 400 мең һум самаһына кәметте. Быға, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, бригадаларҙа һәм участкаларҙа эш көнөн тығыҙлау кеүек саралар ҡулланыу арҡаһында өлгәшелде.

Беренсе Май байрамын достойно ҡаршылау өсөн әҙерләнеп, алдынғы эшселәр, бригадалар һәм участкалар серьез производство уңыштарына өлгәштеләр. Монтаж участкаһында эшләүсе Расков бригадаһының производство уңыштары айырыуса иғтибарға лайыҡлы булып тора. Бында слесарҙар, баҡырсылар һәм монтажсылар группалары бар. Уларҙың күпселеге ФЗО мәктәбен тамамлап практик эшкә килгән йәш эшселәр. Улар бөтәһе лә стахановсылар. Бригада март айынан бирле хужалыҡ иҫәбе нигеҙендә эшләй. Был хужалыҡ иҫәбенә күсерелгән берҙән-бер бригада әле. Беренсе практик эштәр ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе: бригада тик бер март айында ғына 15 мең һумлыҡ экономия яһаны.

Тимәк, заводтың яҡшы эшләргә бөтә мөмкинлектәре бар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дөйөм алғанда, завод әле ҡәнәғәтләнерлек эшләй, тип булмай. Күптән түгел генә булып үткән йыйылыштарҙың береһендә завод директоры иптәш Мозговой паровоздарҙы ремонттан сығарыу буйынса артта ҡалыу һәм валовой продукция буйынса пландың үтәлмәүе фактын үҙе үк танырға мәжбүр булды. Ә заводтың канцелярияһында ултырыусы һәм артыҡ объективлек настроениеһенә сумған ҡайһы бер бүлек начальниктәре ярҙамсы цехтарҙың «уңыштарына» ҡарап һоҡланып бөтә алмайҙар, һүҙ төп цехтарҙың эшенә ҡағылғанда, улар йәһәт кенә һүҙҙе икенсегә бороп ебәрергә ынтылалар.

— Беҙҙә иң алдынғы цех — тәгәрмәс цехы. Ул март айы планын 111 процентҡа үтәне, — тип белдерә заводтың план бүлеге начальнигы иптәш Давыдов. Ә иң төп цехтарҙың береһе булған котельный цех тураһында өндәшмәй. Сөнки ул йәнле эштән айырылған, ысын хәлде белмәй. Шуныһы характерле, йылдың I кварталы үткәнгә хәҙер ай ярым. Ә иптәш Давыдов әле яңы уға йомғаҡ яһай. Бындай «оперативлеклек» менән цехтың артта ҡалыу сәбәптәрен белеп булмай инде.

Йәки бына завод управлениеһенең хеҙмәт һәм эш хаҡы бүлеген алайыҡ. Бында кешеләр бик ҙур эш башҡарғандай күренә: арифмометрҙар, счет төймәләре, иҫәпһеҙ күп ҡағыҙҙар һ. б. бөтәһе лә ходҡа киткән. Ә йәнле эшкә килгәндә бында ла бик үк иҫтәре китмәй.

— Бик яҡшы башланғыс, күтәреп киңә алырға кәрәк, — тип маҡтап һөйләнеләр парткомда иптәш Расков бригадаһы тураһында. Был алдынғы эшсе инициативаһына достойный баһа. Завод директоры иптәш Мозговой был бригаданың эш методын башҡа бригадаларға ла күсереү тураһында махсус приказ да яҙған тинеләр. Ләкин был приказдың үҙен күрергә тура килмәне. Сөнки был приказды (әгәр ул булған булһа) быҫтау аҫтында аҫраусы хеҙмәт һәм эш хаҡы бүлеге начальнигы Киреев һүҙ араһында ғына былай тип ҡуйҙы:

— Унда бер нәмә лә юҡ телгә алырлыҡ. Насар эшләйбеҙ әле..

Ғәжәп икән был начальник! Ябай эшселәр ысын мәғәнәһе менән героизм күрһәтәләр, хеҙмәттең гүзәл өлгөләрен бирәләр, ә уның иҫе лә китмәй. Ул, скромный кеше ҡиәфәтендә «насар эшләйбеҙ әле...» тигән була.

Тимәк, канцеляриянан цехтарға, бригадаларға, участкаларға һәм эшселәр эргәһенә барырға кәрәк. Шулай булмағанда бына тигән яҡшы инициативаны ла күрмәй ҡалырға мөмкин. Ә ул инде ғәфү итерлек хәл түгел.

Г. Баян.

Грек башкиҫәрҙәренә тәрән нәфрәт

Беҙ, Башҡортостан яҙыусылары, Грециялағы демократтарҙы үлтереүҙәргә Совет Хөкүмәтенең протесе тураһындағы ТАСС белдереүен тыңлағандан һуң, ул белдереү менән тулыһынса килешәбеҙ.

Беҙҙең туған хөкүмәтебеҙҙең немец илбаҫарҙарына ҡаршы көрәштә актив ҡатнашҡан патриоттарҙы грек монархистарының йыртҡыстарса үлтереүҙәренә ҡаршы протесе — күп милләтле совет халҡының фекерен һәм тәрән нәфрәт тойғоларын сағылдыра. Бындай ҡоторонған фашистик террорҙың англо-американ империалистәре тарафынан әҙерләнгәнлеген беҙ яҡшы беләбеҙ. Бөтә демократик ил, һис һүҙһеҙ, грек патриоттары яғында һәм Маркостың Халыҡ Хөкүмәтен Грецияның законлы хөкүмәте тип таный.

Беҙ, Башҡортостан совет яҙыусылары, Грециялағы реакцияның ҡанлы ҡоторонҡоуына тыныс ҡарай алмайбыҙ. Беҙ — ҡулыбыҙға ҡорал алып, бөтә донъя халҡтарына оҙаҡ ваҡытҡа һуҙылған тыныслыҡ килтереү өсөн һуғышҡан кешеләр. Беҙ, ҡорал алып, бөтә кешелектең бәхете өсөн һуғыштыҡ. Беҙ монархо-фашистарҙы тарар рәүештә дошман күрәбеҙ һәм империалистарҙың һәр төрлө әҙләнеүҙәрен аяуһыҙ фаш итәсәкбеҙ.

Ғ. Әмири, Х. Кәрим, Р. Нигмәти, Б. Бикбай, С. Агиш, Ә. Вәли, С. Кулибай, Ғ. Зөлкәрнәев, Ҡ. Даян, П. Куликов.

Беҙҙең протест

Грецияла ҡанлы бысаҡҡа кем,
Кем ихтыяры шулай юл асҡан?
Кем ғәйепле? Ерҙә бармы хөкөм,
Бармы хөкөм һатлыҡ палачҡа?!
Кем теләге менән сафулистар
Афина һәм Гуди яныңда,
Көпә-көндөҙ кеше үлтерәләр
Бөтә донъяң күҙе алдында?..
Дүрт йыл буйы фашистарға
ҡаршы
Һалдат булып үткән өсөнмө?
Янки идолына ғорур башын
Мәңге эймәҫ булған өсөнмө?
Үлем менән һис тә үлтереп
булмай
Бөйөк идеалын кешенең!
Ул йәштәргә тыуған! Көсһеҙ
бында
Ҡанлы ҡулы Грисуолд иненең!
Ғәҙел донъя! Әгәр атһың тиһәң,
Ысын азатлыҡтың ал таңы,
Алып ташла һин грек өҫтөнән
Күтәрелгән ҡанлы балтаны!
Ишет донъя! Грек туғандарҙың
Ҡанлы мәйетенә күҙ терәп,
Судҡа саҡырып палач булғандарҙы
Башҡорт халҡы протест белдерә!

Лоҡман Хәким.

Район газеталары биттәренән

Колхоз ауылы

Золотоношка ауылында Октябрь революцияһына тиклем грамоталы кешеләр бик аҙ ине. Бында бит ауылға бары бер генә башланғыс мәктәп булып, уны тамамлап сығыусыларҙың һаны һәр йылды 4-5 кешенән дә артыҡ булмай торғайны. Шулай уҡ, культура һәм һаулыҡ һаҡлау эштәренә лә бер кем дә иғтибар итмәне.

Золотоношка ауылының йөҙө, тик совет власы йылдарында — колхоз төҙөлөшө нигеҙендә генә элеккегә сағыштырмаҫлыҡ кимәлдә нык үҙгәрҙе. Ул — Стәрлетамаҡ районында иң культуралы колхоз ауылы.

«Победа» газетаһы «Золотоношка — районда культура үҙәге» тигән баш аҫтында ойошторған материалдарында түбәндәгеләрҙе яҙа:

«...Халыҡ мәктәбе был ауылда Октябрҙән һуң ғына тыуҙы. 1932 йылда ете йыллыҡ, ә 1946 йылда урта мәктәп ойошторолдо. Грамотаһыҙ кеше юҡ. Ете йыллыҡ мәктәп белеменә эйә булыусы кешеләр йөҙәрләп һаналалар.

...350 уҡыусы бала яҡшы йыһазландырылған ҙур мәктәптәрҙә уҡый. Урта мәктәптең физика кабинеты райондағы физкабинеттарҙың иң байы иҫәпләнә...»

Культура-ағартыу эштәре лә киңдән-киң үҫә бара. Колхоз 160 мең һумға төшөрөп ике ҡатлы культура йорто һалды. Парткабинет, агитпункт, уҡыу һәм ултырыштар залдары, библиотека бөтә кәрәк нәмәләр менән тулыһынса тәьмин ителгәндәр. Библиотеканың 4 мең дана китабы, 700 уҡыусыһы бар. Уға ошо йылдың һуңғы яртыһында ғына 5 мең һумлыҡ төрлө яңы китаптар һатып алынды.

Культура йорто матур баҡса эсендә ултыра. Колхозсылар, уҡыусылар буш ваҡыттарында баҡсала күңелле ял итәләр, шахмат, волейбол уйнайҙар, концерттар тыңлайҙар, кино-картиналар ҡарайҙар.

«Колхоз правлениеһе үткән йыл 12 мең 500 һумға тауышлы киноаппарат һатып алды. Быны менән эш итеү өсөн колхоз члены В. Майстренко иптәш Мәскәү ҡалаһындағы киномеханиктәр әҙерләү курсына ебәрелгәйне. Ул яҡшы уҡып ҡайтты һәм бер йылға яҡын ваҡыт эсендә халыҡҡа 41 кино-картина күрһәтте» тип яҙа газета.

Колхоздың үҙенең электростанцияһы, радиоузелы, больницаһы бар. Хәҙер уның общественный биналары, колхозсыларҙың йорттары «Ильич лампочкалары» менән яҡтыртылалар. Больница Кварц лампочкалары, диатермия, соллюкс кеүек ҡиммәтле электр приборҙары менән дә байытылды.

«Победа» газетаһы Шевченко исемендәге был колхоздың бөгөнгө культура үҫешен яҡтыртыу менән бергә, уның 1948 йылға билдәләнгән эштәр планына ла туҡталып үтә. «Алдағы эштәр планы» тигән хәбәрҙә беҙ түбәндәгеләрҙе уҡыйбыҙ:

«...Колхозда кирбес заводы төҙөлә. Төп производство процестәре электрик көсөнә күсереләсәк. Телефондар селтәре киңәйтелә. Бөтә бригадаларға, фермаларға, бригадирҙарҙың йорттарына телефондар индереләсәк. Культура баҡсаһын ҙурайтыу, колхозсыларға яңы йорттар алыу күҙҙә тотола...»

Һөҙөмтә яһап шуны әйтергә кәрәк: газетаның инициативаһы уңышлы сыҡҡан. Материалдар асыҡ фактылар менән эстәлекле итеп бирелгәндәр.

Шефлыҡ эшенең яуаплы осоро

Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын үҫтереү саралары тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары менән промышленность работниктәренә лә ҙур бурыстар йөкмәтелде. Был тарихи ҡарарҙан һуң, беҙҙең завод коллективы машина-трактор станцияларын шефҡа алып, байтаҡ материаль-техник ярҙам күрһәтте.

Яңы йыл башынан коллектив Әлшәй районының Әбдрәшит, Ташлы машина-трактор станцияларынан тыш, Аксен МТС-ына ла шефлыҡ итә башланы. Беҙҙең ярҙам бигерәк тә тракторҙар өсөн запас частәр етештереүҙән һәм ремонт материалдары биреүҙән торҙо. Квалификациялы кадрҙар етешмәүе Аксен машина-трактор станцияһында ремонт эштәрен өҙөлөү ҡурҡынысы аҫтына килтереп баҫтырғайны. Завод квалификациялы кузнецтар бригадаһы ебәреп, ярҙам итте.

Күрһәтелгән ярҙам байтаҡ. Ләкин беҙ быныц менән генә сикләнә алмайбыҙ. Шефлыҡ эшенең яуаплы осоро — яҙғы баҫыу эштәре осоронда ярҙамды тағы ла көсәйтеү бурысын ҡуйҙыҡ. Ул ярҙам бигерәк тә күсмә ремонт мастерскойҙарын инструменттар менән, ә трактор бригадаларын заправка инвентарҙары менән тәьмин итеүгә юнәлтелә. Хәҙер күсмә мастерскойҙар өсөн 100 дана гайка асҡысы, 30 дана каптельник һәм 130 дана башҡа төр инструменттар әҙерләнде. Тракторҙарға заправка яһау өсөн 60 биҙрә, 30 бурачка ебәрҙек.

Баҫыуҙа тырышып эшләгән кешеләрҙе культуралы хеҙмәтләндереү шулай уҡ шефтарҙың мөһим бурысы булып тора. Коллектив быны аңлай. Хәҙер беҙҙең күсмә библиотека өсөн китаптар тупланды һәм ул ошо көндәрҙә МТС-тарға оҙатыла. Заводтың профсоюз һәм комсомол ойошмаһы культбригадалар ойошторҙо.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары нигеҙендә завод коллективы үҙенең шефтарына мөмкин булған бөтә ярҙамды күрһәтергә әҙер һәм МТС работниктәре кеүек үк, социалистик баҫыуҙарҙа юғары урожай алыуҙа үҙендә яуаплылыҡ һиҙә.

А. А. Максимов,
агрегат заводының баш инженеры.

Әүхәди аттары

Конюшня алдындағы ҙур әүеҙҙә, ҡойроҡтарын теҙә сәнсеп, көр аттар уйнаҡлай. Ҡарсығатауҙы, оҙон, ҡалын ҡаҙҙалле кеше бер ҡулы менән таяҡҡа таянып, шул аттарға ҡарап, йылмайып тора. Күреүселәр «Әүхәди аттары уйнаҡлай» тип, һоҡланып үтәләр. Таяҡҡа таянып, йылмайып торған был кеше — Ҡандра күл ауылындағы «Ҡыҙыл балыҡсы» колхозының өсөнсө бригадаһындағы өлкән конюх Әүхәди Тохбәтуллин. Уның янына етеҙ хәрәкәтле, үткер малай килеп баҫты.

— Әүхәди ағай, бригадир миңә бер ат алырға рөхсәт итте. Һәйбәт кенә бер ат бир әле. Тибешә торғаны булмаһын. Өсөнсө көн бирҙән атың мине тибеп үлтерә яҙҙы. Арбаның алдынараҡ ултырған булһам, ауыҙҙы емерә ине. Ундай уҫал ат булмаһын, һәйбәтен бир,— тине был малай.

Әүхәди, таяғына ике ҡулы менән таянып, бер аҙ алғараҡ эйелә биреп, малайҙың күҙҙәренә ҡарап:

— Ат уҫал түгел, һин үҙең уҫал, миңә шулай нык һуғаһың атҡа?— тине.

Малай аптырап ҡалды.

— Кем әйтә, кем күргән минең нык һуҡҡанды?

— Танма, танма! — тине Әүхәди.

Әүхәдиҙең дөрөҫ һүҙе малайҙың башын эйҙе. Малай түбән ҡарап: «Кем күрҙе икән минең шулай нык һуҡҡанды? Яланда бер кем дә юҡ ине лә баһа. Әллә ситтән генә берәрһе ҡарап торҙомо икән?» — тип уйланы һәм башын күтәреп:

— Әйт әле, Әүхәди ағай, кем күргән? — тип, ҡабатлап һораны.

—Ярай, ярай, танма, әйт дөрөҫөн; дөрөҫөн әйтһәң, мин дә әйтермен, — тине Әүхәди. Малай ауыр ғына көрһөнөп, түбәнерәк ҡарап, дөрөҫөн һөйләп бирҙе.

— Дөрөҫ, Әүхәди ағай, һуҡҡайным; асыуланыбыраҡ, бына ошо һинең таяҡ кеүек, бер таяҡ менән бик нык итеп һуҡҡайным. Шунан ат та асыуланып, артҡы аяҡтары менән тибеп, ауыҙҙы емерә яҙҙы— тине.

Әүхәди аттар яғына ҡарап:

— Ат булһам, мин һинең таяҡ менән һуҡҡан ҡулдарыңды тибеп һындырыр инем, — тине.

— Иә, әйт инде, Әүхәди ағай, мин әйттем бит; кем күргән?

— Бер кем дә күрмәгән, үҙем беләм. Миңә кешенең күреүе кәрәкмәй. Һин шуны бел: ат хаҡында мине бер кем дә алдай алмай.

— Әйт әле, Әүхәди ағай, нисек белдең?

Әүхәди, таяғына ике ҡулы менән нығыраҡ таянып, тағы ла алғараҡ эйелә төшөп, малайҙың күҙҙәренә ҡарап һөйләй башланы:

— Һәр бер йән эйәһе дошманынан һаҡланырға тырыша. Һин атты асыу менән һуҡҡас, ул һине үҙенең дошманы итеп күргән. Шуның өсөн һинән һаҡланырға теләп, тибергә мәжбүр булған. Бында атты ғәйепләп булмай, һин ғәйепле. Ат үҙенең дуҫына теймәй. Аттың дуҫы булырға кәрәк. Төшөндөңмө? Бар, ана юған ал да, шул тыҡмаған атыңды тот әле, мин ҡарап торайым, нишләр икән? — тине.

Малай маңлайынан биттәренә ағып төшкән тирҙәрен еңе менән һөртөп, бер һүҙ ҙә эндәшмәйенсә, юған алырға китте. Конюшня эргәһендә элеүле торған бер юғанде алып, теге ат янына барҙы. Ат, ҡолаҡтарын йомоп, малайға арты менән әйләнде. Малай, тибелеүҙән ҡурҡып, артҡа сигенде.

— Күрҙеңме, ат нишләй? — тип ҡысҡырҙы Әүхәди һәм, таяғына таянып, әкрен генә аҡһап, шул ат янына барҙы. Ат, үҙенең яҡын дуҫы Әүхәдиҙең атлауын, тын алышын һиҙеп, уға боролдо. Аттың аҡыллы күҙҙәре мөләйемлек менән Әүхәдигә ҡаранылар. Әйтерһең уның елкәһенә әкрен генә һалып, есҡәп, кәмәлер әйтергә теләгән кеүек, балаларса иркәләнде. Әүхәди аттың муйынын һыйпап, малайға боролдо.

— Кил, кейҙер юғанде, — тине. Малай юған менән ат алдына килде. Ат уны күргәс тә, муйынын һуҙып, ҡолағын йомдо.

— Ҡурҡма, кейҙер юғанде.

Малай юғанде ике ҡулы менән ат башына һуҙғанда, ат башын күтәреп, муйынын ситкә борҙо.

— Һин, туған, аттың башына ла һуҡҡанһың бит, — тине Әүхәди.

Малайҙың күҙҙәренә йәш килде.

— Дөрөҫ, Әүхәди ағай, һуҡҡайным, — тине.

— Ат—бик хәтерле хайуан ул. Насарлыҡты ла, яҡшылыҡты ла онотмай. Һин бер ваҡытта ла шуны иҫтән сығарма. Ат — бик ғәрсел хайуан ул, һаҡ булырға кәрәк. Ирендәрен тешләп, ат тыҡмаған кеше кешеме ни ул. Атты ҡараһаң — ат була, ҡарамаһаң — ят була. Шулай, туған, ат менән дошманлашырға ярамай, дуҫ булырға кәрәк. Ат — аҡыллы хайуан ул. Уның тик теле генә юҡ. Ҡайҙа, бир юғанде.

Әүхәди, атҡа үҙе юған кейҙереп, теҙгенде малайға бирҙе.

— Мин әйткәндәрҙе онотмаҫһыңмы?

—Юҡ, Әүхәди ағай, бер ваҡытта ла онотмам, — тине малай.

Ҡандра күл колхозсылары Әүхәдигә: «Әллә һин ат телен беләһеңме?» тиҙәр. Аттарҙың теле булмаһа ла, Әүхәди уларҙы аңлай, һәм аттар ҙа уны аңлайҙар. «Ат яҡшы күңел менән яратып әйткәндә лә һәм асыу менән һүгенеп әйткәндә лә аңлай ул» ти Әүхәди. Ул һәр бер аттың холҡон, ғәҙәтен белә. Шуға ҡарап, улар менән мөғәмәлә итә. Әүхәди ағай әйтә: «Конюх булған кеше өсөн аттарҙың холоҡ-ғәҙәттәрен белеү генә етмәй, колхоздағы бөтә кешеләрҙең дә холоҡ-ғәҙәттәрен, характерҙарын белергә кәрәк. Әйтәйек, ҡыҙыуыраҡ характерле кешегә бик йылдам ат биреп булмай. Ундай кеше атты ҡыуа ла ҡыуа. Шулай итеп, меҫкен хайуанды атты сәсәтеп, аяҡтан йығыуы мөмкин. Ундай ҡыҙыу характерле кешегә артыҡ ыжламай торған ат бирергә кәрәк» ти ул.

Әүхәди ағай — йәштән үк мал араһында үҫкән кеше. Ҡандра күл ауылында колхоз ойошторолғанға тиклем кеше малдарын көттө. Колхозға ингәс тә, дөйөмләштерелгән аттарҙы үҙ иҫәтаһына ҡуйҙы. Уларҙы ул, дөйөм конюшня яһалғанға тиклем, дүрт йыл буйынса, шунда ҡараны. Колхоз ойошторолғандан алып, ошо көнгә тиклем Әүхәди ағай колхоз аттарын ҡарай. Ошо 18 йыл эсендә өс йыл ғына аттарынан айырылып торҙо. Ул 1941 йылда Ватан һуғышына китә. Унда ла аттан айырылмай, кавалерияла хеҙмәт итә. Әүхәди аттар менән бик оҫта мөғәмәлә иткәнгә күрә, эскадрон командиры ҡайһы саҡта: «Тохбәтуллин Әүхәди иҫән булһа, эскадронға ветврач кәрәкмәй» тип әйтә торған булған.

Әүхәди 1944 йылдың йәйендә госпиталдән Ҡандра күл ауылына ҡайта. Уның бер аяғы яраланған. Ул һаман да, бер ҡулына таяҡ таянып, аҡһабыраҡ йөрөй. Ул ҡайтып төшкән көндә үк аттар янына барҙы.

Колхозда өс бригада. Ул бригадалағы аттарҙың бөтәһен дә Әүхәди ҡарап үҫтергән. «Колхоздағы бөтә аттар ҡолон сағынан миндә үҫкәндәр» ти ул. Хәҙер өсөнсө бригадала, Әүхәди ҡулында, яңы тыуған ҡолондар менән 28 баш йылҡы бар. Тағы өс бейә быуаҙ. Ошо уйнаҡлап йөрөгән көр йылҡыларҙың уң һигеҙе һабанға әҙерләнгән.

Әүхәди — йылҡы үрсетеүҙә күптәнән танылған кеше. Үҙ эше буйынса тәжрибәһен байытһын тип, уны 1939 һәм 1940 йылдарҙа Мәскәүгә ауыл хужалығы күргәҙмәһенә ебәрҙеләр. Ул, унда күп кенә нәмә күреп, малсылыҡ буйынса байтаҡ ҡына тәжрибә алып ҡайтты.

Колхоз, уның намыҫлы хеҙмәтен хөрмәтләп, үткән йыл Әүхәди ағайҙы бер тана һәм күп кенә иген менән бүләкләне.

Бер быуаҙ бейә янына барып, уның арҡаһынан һыйпап: «Бөгөн йә иртәгә ҡолоноң булыр» тип, һөйөп ҡуйҙы. Ул һәр бер бейәнең ни ваҡытта ҡолонлаһын белә. Һыуыҡ ваҡыттарҙа яңы тыуған ҡолон туңа күрмәһен, тип, төндәр буйы йоҡламайынса ҡарап йөрөй. Ҡолондарҙы ул үҙ балаһы кеүек итеп, ҡәҙерләп тәрбиәләй.

Әүхәди аҙ күктәге ҡояшҡа ҡарап, йылмайып ҡуйҙы. «Ҡыҙҙыр әйҙә, ҡыҙҙыр, болот аҫтына инмәйенсә генә, көн буйы шулай нурланып торһаң, иртәгә ер һөрәрлек буласаҡ» тип, үҙ алдына һөйләнде һәм һабанға әҙерләнгән аттарҙы тағы ла бер ҡат берәм-берәм ҡарай башланы.

Ҡадир Даян.
Ҡандра районы.

Алдынғы һарыҡсылыҡ фермаһының тәжрибәләре

Дәүләкән районы «Новый быт» колхозындағы тоҡомло һарыҡсылыҡ фермаһының эш тәжрибәләре бөтә колхоздар өсөн дә өлгө булырлыҡ. Был фермала Мария Павловна Виниченко 1934 йылдан бирле эшләй. Тәүҙә ул чабан булған, ә хәҙер — мөдир. Фермаһын өлгөлө эшләүе тәьмин итеүе өсөн ул Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән наградланған, дипломдар һәм бүләктәр алған.

Фермала планда ҡаралған 500 баш урынына, 560 баш «прекос» тоҡомло һарыҡ бар. Ә 1947 йылда ферма 300 баш һарыҡтан 435 бәрәс алды. Шул иҫәптән йылына ике тапҡыр бәрәсләгән 50 баш һарыҡтан ғинуарҙа 69 һәм декабрҙә 56 бәрәс алынды. Һәр һарыҡтан 3,2 килограмм урынына 4,2 килограмм йөн ҡырҡылды. Ферма йөкләмәһен үтәгәндән һуң, государствоға 1000 килограмм йөн тапшырҙы. 10 баш өсөнсө республика колхозлары өсөн заготживконтораға 2000 баш, шул иҫәптән 1947 йылда 72 баш йөн тоҡом һарыҡ һатылды. Ферма работниктәре хеҙмәт көндәренә өҫтәмә түләү тәртибендә 34 бәрәс һәм 26 килограмм йөн алдылар.

— Был уңыштарға, — ти иптәш Виниченко, — беҙ беренсе нәүбәттә һарыҡтарҙы тороҡторорға һәм бәрәсләүгә дөрөҫ әҙерләү, уларҙы яҡшы тәрбиәләү һөҙөмтәһендә өлгәштек.

Фермала һарыҡтарҙы тороҡтороу яһалма орлоҡландырыу методы менән үткәрелә. Тороҡтороуҙы башлауҙан 40 көн алда тороҡтороусы һәм һынаусы тәкәләргә аҙыҡ биреү арттырыла. Рационға иң яҡшы бесән индерелә һәм һәр бер тәкәгә 900-әр грамм һоло бирелә. Уларҙы ашатыу һәм эсереү көнөнә 3 тапҡыр үткәрелә. Тороҡтороуҙы башлауға тиклем тәкәләрҙең сперма сифаты тикшерелә, тояҡ осо ҡырҡыла һәм күҙҙәре әйләнәһендәге йөндәр ҡиҫелә. Пунктта яҡшы тоҡомло, беренсе класлы 2 тәкә бар. Уларҙың һәр береһенең тере килеш ауырлығы 100 килограмм тәшкил итә, улар 10-ар килограмм йөн бирәләр. Тороҡтороуҙы башлауға улар тулы кәрләккә килтереләләр.

Ябыҡ һәм ауырыу һарыҡтар ашатыуға һәм дауалауға ҡуйылалар һәм тороҡтороу ваҡытына тиклем юғары кәрләккә еткереләләр.

Һарыҡтарҙы орлоҡландырыу һәр йылды сентябрь—октябрь айҙарында үткәрелә. Уларҙың тороҡтороуға ынғайлылығын белеү өсөн, отара менән көтөүгә һынаусы тәкәләрҙе ҡушалар. Тороҡторолоуға ынғайлы һарыҡтар шунда уҡ көтөүҙән айырылып алына.

Һарыҡты тәүге тапҡыр орлоҡландырыу уның ынғайлы көнөндә үткәрелә. Әгәр ул 12 сәғәттән һуң тағы ла ынғайлығын һиҙҙерһә, ул ҡабаттан орлоҡландырыла. Тәүге орлоҡландырыуҙан һуң, 24 сәғәт ваҡыт үткәс, уның тағы ла ынғайлығы һиҙелһә, ул өсөнсө тапҡыр орлоҡландырыла. Орлоҡландырылған һарыҡтар айырым урында тотолалар һәм 10—15 көн үткәс, улар һынау тәкәләр ярҙамында ҡабаттан һыналып ҡаралалар. Ошондай сараларҙы ҡулланыу арҡаһында «Новый быт» колхозының күпселек һарыҡтары игеҙ бәрәсләйҙәр.

— Тороҡтороуҙы үткәреү менән уҡ, — ти иптәш Виниченко,—беҙ һарыҡтарҙы ҡышҡа әҙерләй башлайбыҙ. Көтөүҙе иң яҡшы үләнле ергә күсерәбеҙ һәм иртәле-кисле өҫтәмә рәүештә бесән бирәбеҙ. Ә көндәр һалҡынай башлау менән бесән нормаһы арттырыла һәм йышыраҡ бирелә. Ҡышҡы көндәрҙә һарыҡтарға көнөнә 4 тапҡыр ашатабыҙ, 2 тапҡыр эсерәбеҙ. Бесәнгә бәрәсләгәндә, концентрат һәм минерал аҙыҡтарҙы алмаштырабыҙ. Яҡшы көндәрҙә һарыҡтар асыҡ һауала ашатыла. Шулай уҡ һутлы аҙыҡтар, һәр бер һарыҡҡа көнөнә 300-әр грамм силос һәм сөгөлдөр бирәбеҙ. Быуаз һәм түбән кәрләктәге һарыҡтар айырыуса яҡшы тәрбиәләнә.

Ғинуар-февраль айҙарында һарыҡтар бәрәсләй башлайҙар. Иптәш Виниченко уны ла яҡшы әҙерлек менән ҡаршылай. Фермала бәрәсләү өсөн айырым өй бар. Яңы тыуған һәр бер бәрәстең иң тәүҙә ауыҙ-моронө таҙартыла, кендеге дезинфекциялана һәм инәһенә имергә килтерелә. Имсәктәге тәүге һөт айырым һауытҡа һауыла. Һарыҡтың имсәге таҙартыла, уның яғындағы йөндәр ҡырҡыла, тәнендәге бысыранған урыҡ марганец-калий әсетмәһе менән йыуыла һәм ҡоро сепрәк менән һөртөлә. Һарыҡ бәрәсләгәс тә, айырым клеткаға ялға ҡуйыла. Тик 1—1,5 сәғәт ваҡыт үткәс, уға туйғанса йылы һыу һәм бесән, ә 4—5 сәғәт үткәс, 50—100 грамм концентрат бирелә. Ул тик икенсе көндә генә тулы нормаға күсерелә. Йыш бәрәсләгән һарыҡтарға һәр көн концентрат биреү 200 грамға тиклем арттырыла. Игеҙ бәрәсле һарыҡтың һөтө аҙ булһа, уның көслөрәк бәрәсе яңғыҙ бәрәсле һөтлө һарыҡҡа ҡушыла. Яңғыҙ бәрәсле һөтһеҙ һарыҡтың бәрәсе һәм инәһе үлгән бәрәс шулай уҡ һөтлө һарыҡҡа беркетелә. Әгәр һарыҡ бындай бәрәсте ҡабул итмәһә, улар махсус станокка ҡуйылалар һәм был һарыҡтан һауылған һөт менән бәрәстең арҡаһы сылатыла. Һарыҡ 4—5 сәғәттән һуң бәрәсте үҙләштерә.

Бәрәстәр, гәҙәттә, 15—20 көнлөк булғас, аҙыҡҡа өйрәтелә башлайҙар. Уға аҙыҡ өсөн витаминле ваҡ бесән, онталған һоло бирелә. Бындай аҙыҡ йыш бәрәсләгән һарыҡтарҙың бәрәсенә һәр көн 30—40, ә гәҙәттәгеләргә бәрәсләгән һарыҡ бәрәсенә 20—25 грамм бирелә. Бәрәскә бер айға тиклем аҙыҡты ошо рәүештә биреү дауам ителә, а унан һуң аҙыҡтың күләме аҡрынлап арттырыла. Ошо ваҡыттан алып, бәрәс минерал аҙыҡҡа — тоҙ ялауға һәм ағас күмере ашауға өйрәтелә.

Бәрәсле һарыҡтар 5 тәүлек буйына айырым клеткаларҙа торалар. Бынан һуң, бәрәстәр үҙ инәһенә ныҡ өйрәнгәс, уларҙы төркөмдәргә бүләләр. Ул бәрәстәрҙең бер үк йәштә, үҫештә һәм сәләмәтлектә булыуҙарына ҡарап эшләнә. Насар үҫкән бәрәстәр айырым төркөмгә яҡшы тәрбиәгә торалар. Игеҙ бәрәсле һарыҡтар ҡамерек һаҡлы төркөмдәргә бүленә. Төркөмдәр түбәндәгеләй төҙөлә:

6—10 көнлөк бәрәстәр	10—14 баш һарыҡтан
10—15 —»—	15—20 —»—
16—20 —»—	25—35 —»—
21—30 —»—	35—60 —»—
31—40 —»—	60—90 —»—

Төркөмдәрҙе артабан эҙрләндереү көндәр йылыныу төшөү менән үткәрелә.

Көтөүлектәрҙә үлән яҡшы булып үҫкәнгә тиклем бәрәстәр ферма тирәһендә тәрбиәләнә. Өлкән йәштәге бәрәсле төркөмдәр көтөүгә иң тәүҙә сығарыла. Унан һуң кесе йәштәге бәрәсле төркөмдәр сығарылалар. Ә һалҡын көндәрҙә иң кесе бәрәсле төркөмдәр фермала ҡалдырылалар.

Бәрәстәр 3—4 айҙан һөттән айырыла. Һөттән айырылған бәрәстәр төркөмдәргә — тәкәләргә һәм икә бәрәстәргә бүленәләр. Уларҙы айырым көтөүҙәрҙә йөрөтәләр.

— Һарыҡтарҙы, — ти чабан Игнат Проценко, — көтөүгә иртәнге 5—6 сәғәттә алып сығам. Ә үлән ысыҡлы көндәрҙә көн йылынғас, ысыҡ кипкәс сығарам. Бындай саҡтарҙа улар ныҡ ҡына асығалар. Шуға күрә һуҡлап сыҡҡан көндәрҙә уларҙы ҡаты үләнле көтөүлектә йөрөтәм һәм аҡрынлап яҡшы үләнле урындарға күсерәм. Көндөҙгө 11 сәғәттә һыу эсерәм. Һыу эсереү алдынан һарыҡтарҙы тынысландырыу өсөн 15—20 минут тотоп торам, ә унан һуң ялғаштарҙағы һыуға килтерәм. Һыу эсерелгәндән һуң — көндөҙгө сәғәт 2-гә тиклем ял. Ә унан һуң кискә 9—10 сәғәткә тиклем тағы ла болонлоҡта ашатам. Көтөүлек майҙанын 4—6 клеткаға бүләбеҙ һәм уның үләнен нәүбәтләп ашатабыҙ.

Иптәш Виниченко етәксеелек иткән ферма работниктәре үҙҙәренең намыҫлы хеҙмәттәре менән һарыҡсылыҡ фермаһын колхоздың ҙур доходлы тармағына әйләндерҙеләр. Уларҙың эш тәжрибәләрен өйрәнеү һәм үҙләштереү бөтә һарыҡсылыҡ фермалары өсөн ҙур файҙалы эш.

Ф. Мальков.

Һүрәттә: М. П. Виниченко.
Л. Яҡупов фотоһы.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Берлин өҫтөндә ике самолеттың һәләкәткә осрауы тураһында Англияның тикшереү комиссияһы

ЛОНДОН, 14 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Берлиндан хәбәр итеүенә ҡарағанда, 13 майҙа Англия хәрби администрацияһы штабында, Берлин өҫтөндә Англияның транспорт самолеты «Викинг» менән совет истребителе «Як» бәрелешкәндә 14 кешене үлемгә килтереүсе һауа һәләкәте шарттарын тикшереүҙе яңынан башлағанда, «бәлә — бәхетһеҙлек ваҡиғаһының һөҙөмтәһе булып тора» тип официаль ҡарар сығарылған.

Германияның Англия оккупация зонаһында «Новое время» журналының немец телендәге басмаһын таратыу тыйыла

ЛОНДОН, 14 май. (ТАСС). Германиялағы Англия оккупацион властары совет журналы «Новое время»нең немец басмаһын таратыуҙы тыйҙылар. Улар үҙҙәренең был ҡарарҙарын, был журнал немец, оккупациялаусы державаларға ҡаршы сығыуға юл ҡуймау тураһында союзный контроль советының ҡарарын боҙа, тип нигеҙләйҙәр.

Палестина сигендә Сирия ғәскәрҙәренең туплауы

ДАМАСК, 14 май. (ТАСС). Кисә Палестина сигендә Сирия ғәскәрҙәре туплана башланы. Иртәнән алып Дамаск—Бейрут юлы буйынса бронетанк һәм артиллерия частәре Ливандың көньяғына табан йүнәлделәр, пехота һәм кавалерия подразделениелары Дамаск—Эль—Кунайтра юлы буйынса киттеләр.

Грецияла Америка хәбәрсеһенең үлтерелеүе

ЛОНДОН, 16 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы Афинынан хәбәр итә. Был хәбәрҙә, Американың радио аша тапшырыу компанияһы — Колумбияның хәбәрсеһе Джорж Полктың кәүҙәһе бөгөн йылға буйында, Салоникигә яҡын урында табылды, тип әйтелә. Рейтер агентствоһының икенсе хәбәрендә, Полк ҡулдары һәм аяҡтары бәйләнгән килеш йылғаға ташланған, тип күрһәтелә.

Джорж Полк быйыл күп кенә хәбәрҙәр тапшырған. Был хәбәрҙәрҙә ул Грецияның демократик көстәре тураһында ыңғай фекер белдергән һәм Софулис—Цалдарис хөкүмәтен тәнҡитләгән.

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 16 май. (ТАСС). Греция демократик армияһының радиостанцияһы Македонияла демократик армияның майҙың тәүге 10 көнө эсендә алып барған операциялары тураһында Элефтери Эллада агентствоһының хәбәрен тарата. Козани районындағы демократик армия частәре 4 майҙа, нығытылған Клитос ауылына ингәндәр һәм бер нисә аҙыҡ-түлек складын яндырғандар. 7 майҙа ҡаршы төндә демократик армия частәре ошо уҡ районда өс монархистик-фашистик отрядты [illegible] мәжбүр иткәндәр, был отрядтар Петрулофос ауылын ҡалдырғандар.

9 майҙа ҡаршы төндә демократик армия подразделениелары Софулар ауылын алғандар. Козани районында алып барылған бөтә һуғыш хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә дошманға ҙур юғалтыуҙар [illegible].

Демократик армияның [illegible] менән ҡоралланған частәре [illegible] майҙа дошмандың [illegible] Ардеағә [illegible] Промахи ауылындағы [illegible] ларҙы атаҡлағандар. Был [illegible] районында дошмандың 24 [illegible] үлтерелгән һәм бик күп [illegible] яраланған.

7 майҙа демократик армия [illegible] Хасия ҡалаһының көнбайышында [illegible] башлағандар. 2 көн [illegible] иткән һуғыш ваҡытында дошмандың 80-дән артыҡ һалдаты үлтерелгән. Дошман, демократик армия частәре тарафынан [illegible] Гревены [illegible].

Америка Төркиәгә ҡоралдар ебәрә

ЛОНДОН, 16 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Стамбулдан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Американан 12 мең тонна һыйҙырышлы «Сибоней» авианосецы бөгөн Ешилькөйҙә (Стамбулға яҡын урында) туҡтаған. Был авианосецта Төркиәгә «ярҙам» итеү планы буйынса Төркиә авиацияһы өсөн билдәләнгән 18 самолет бар. Улар араһында «Дуглас» тибындағы торпеда йөрөтөүсе бомбардировщиктар, һәм («Сандерболт» [illegible]) «Мустанг» тибындағы истребителдәр бар. «Сибоней» Төркиәгә Американан [illegible] авианосец. Өсөнсө — «Палау» авианосецы [illegible] килеп етәсәк. [illegible] нан тыш, юлда [illegible] һәм снаряжение тейәлгән [illegible] 3 судно бар. Әлегә тиклем хәбәр ителгәнсә, Төркиә [illegible] АКШ-тан 4 [illegible] алған.

Грецияла массовый үлтереүҙәр дауам итә

АФИНЫ, 16 май. (ТАСС). Журналистарҙың мәғлүмәттәренә ҡарағанда, юстиция министры Милас атып үлтереүҙәрҙе ваҡытлыса туҡтатырға бойороҡ биргән. Ләкин был бойороҡ үлем яҙаһы биреү тураһында хәрби судтар тарафынан сығарылған хөкөм ҡарарҙарын үтәүҙе туҡтатырға хәрби властарҙы мәжбүр итмәй.

Шул уҡ ваҡытта судтар үлем яҙаһы биреү тураһында хөкөм ҡарарҙарын сығарыуҙы дауам итәләр. Мәҫәлән, кисә Пирей суды немец оккупацияһы осорондағы хәрәкәттәр өсөн ЭАМ яҡлы дүрт кешене үлем яҙаһына хөкөм иткән.

Шулай уҡ 1947 йылдың ғинуар айында үлем яҙаһына хөкөм ителгән Иоаннис Патис атып үлтереү өсөн бөгөн Аверов төрмәһенән Фивы ҡалаһына алып барылған, тигән мәғлүмәттәр бар. Патис үҙ ваҡытында Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Салоникиҙағы Балҡан комиссияһы алдында шаһит сифатында сығыш яһағайны һәм Греция хөкүмәте өсөн файҙаһыҙ мәғлүмәттәр биргәйне.

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

НЬЮ-ЙОРК, 16 май. (ТАСС). Матбуғаттың Тель-Авивтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Египет, Трансиордания, Сирия һәм Ливан армиялары еврей государствоһы территорияһына ингәндәр. Кисә урындағы ваҡыт менән сәғәт 6-лар самаһында 4 самолет Тель-Авивте һәм С[illegible]. «Хагана» (еврей армияһы) командованиеһе, самолеттар ике һөжүм [illegible], тип хәбәр иткән. Бер самолет бәреп төшерелгән, Египет [illegible] лоты пленгә алынған. Самолеттар 10 бомба ташлағандар һәм Тель-Авивкә пулеметтарҙан атҡандар. Бер кеше үлтерелгән, өс кеше яраланған. Еврей самолеттары [illegible] итеүселәрҙе таратҡандар.

«Хагана» командованиеһе хәбәр итеүенә ҡарағанда, египетлеләрҙең Газа ҡалаһынан 20 [illegible] төньяҡтараҡ ғәскәр төшерергә [illegible] ташыуҙары кире ҡағылған.

Еврей армияһының моточасте ғәрәптәрҙең биш ауылын алған һәм 128 кеше пленгә алынған.

15 майға ҡаршы төндә Сирия һәм Ливан һалдаттары [illegible] броняле 150 автомобиль Палестина сиге аша сығып, еврей ғәскәрҙәрен атакаға тотҡан. Трансиорданияның Палестинаға килгән [illegible] ғәскәрҙәре Иерусалимдан 10 [illegible] алыҫлыҡта урынлашҡан [illegible] Ациондо алғандар. Еврейҙәр король Абдулланың ультиматумын кире ҡаҡҡандар. Ул Махарә ауылын биреүҙе талап иткән.

Египет ғәскәрҙәре Бейт Дараз ауылын алғандар. Еврей ғәскәрҙәре Иерусалимда ғәрәптәргә ҡаршы атака яһағандар. Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, көн буйына дауам иткән урам һуғыштарынан һуң, Иерусалимда ғәрәптәр һәм еврейҙәр ярашыу тураһында һөйләшеүҙәр башлағандар.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Беҙҙең республикала

Яңы нормалар

Ошо көндәрҙә Черниковск нефть эшкәртеү заводында эш нормаларын ҡайтанан ҡарау үткәрелде. Бының өсөн һәр цехта махсус комиссия төҙөлдө. Уларға мастерҙар һәм иң яҡшы стахановсылар ылыҡтырылды.

Цех комиссиялары ҡыҫҡа срок эсендә бик ҙур эштәр башҡарҙылар. Заводта инде урындағы характерҙағы һәм берләштереүгә мөмкин булған 7.306 норма ҡайтанан ҡаралды. Ҡайтанан ҡарау һөҙөмтәһендә норма ваҡыттарының һәм сдельный түләү хаҡтарының кәметелеүе 18,3 процент тәшкил итә һәм был, заводҡа ҙур экономия бирә. Ләкин был нигеҙҙә үткәрелмәне. Үткәрелгән саралар эш процестарын камиллаштырыу, механизациялаштырыу һәм рационализация тәҡдимдәрен киң рәүештә ҡулланыуҙы иҫкә алып эшләнделәр. Ошо арҡала һәр бер эшсенең хеҙмәт етештереүсәнлеге элеккегә ҡарағанда күп юғары һәм уның реаль хеҙмәт хаҡы ла күп арта.

Эш нормаларын ҡайтанан ҡарау менән бер рәттән цех комиссиялары ойоштороу-техник саралар эшләп сығарыуға керештеләр һәм билдәләнгән сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн цехтарҙа календарь пландар төҙөлә.

Яңы нормалар инде тамамланды. Беренсе көндәр уларҙың реаль булыуын һәм үтәлеүе мөмкин икәнлеген күрһәттеләр һәм был завод коллективының үҙенең социалистик йөкләмәләрен үтәүҙә ныҡлы нигеҙ тыуҙыра.

А. Володина.

Башҡортостан автомотоклубында производствонан айырылмай күп йәш егеттәр һәм ҡыҙҙар уҡыйҙар.
Һүрәттә: (Алғы рәттә, һулдан уңға) курсанттар Н. З. Балицкая һәм Н. Н. Сигова иптәштәр.
В. Жданов фотоһы.

Башҡорт әҙәбиәте буйынса яңы хрестоматия

Башгосиздат 1948—49 уҡыу йылына X-сы класс уҡыусылары өсөн әҙәбиәттән хрестоматия баҫып сығарҙы. Хрестоматия яҙыусы А. Фадеевтың «Йәш гвардия» романынан алынған бер киҫәк глава менән башланып китә. Хрестоматияла шулай уҡ Башҡортостан яҙыусыларынан: Рәшит Ниғмәти, Ғ. Сәләм, Баязит Бикбай, М. Хәй, А. Карнай, С. Мифтахов, Ғәйнан Әмири, Хәниф Кәрим, Мостай Кәрим һәм Йәрми Сәйете иптәштәрҙең күп кенә шиғырҙары һәм хикәйәләре бар.

Дәреслеккә ҡушымта рәүешендә В. И. Лениндең «Партия ойошмаһы һәм партия әҙәбиәте» тигән мәҡәләһе, шулай уҡ «Звезда» һәм «Ленинград» журналдары тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетының 1946 йыл 14 август ҡарарынан өҙөктәр һәм А. А. Ждановтың «Звезда» һәм «Ленинград» журналдары тураһындағы докладының ҡыҫҡаса стенограммаһы урынлаштырылған.

Китапта авторҙарҙың һүрәттәре, уларҙың ижади юлдарын яҡтыртҡан биографик белешмә бирелгән.

Баҫыу стандарында

ХӘЙБУЛЛА. Районда яҙғы баҫыу эштәре башланған көндән алып Аҡъяр, Аҡ юл, Бикбау һәм башҡа ауыл Советтарындағы уҡыу өйҙәре үҙ эштәрен баҫыу стандарына күсерҙеләр. Хәҙер баҫыуҙа эшләүсе колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн йәнле эштәр башланды. Агитаторҙар колхозсыларға ҡысҡырып газета-журналдар уҡыйҙар, «боевой листоктар» сығаралар. Баҫыуҙа өс күсмә кино эшләй.

Шулай уҡ район Советының культура-ағартыу бүлеге башҡорт һәм рус йәштәренән, ике культбригада төҙөнө. Был бригадалар баҫыу стандарында спектаклдәр ҡуйыу һәм концерт номерҙәре биреү менән бергә колхозсылар араһында докладтар, беседалар үткәрәләр.

Рационализаторлыҡ тәҡдимдәрҙән экономия

Башҡортостан нефть промыселдәрендә рационализаторлыҡ тәҡдимдәр индереү һәм уйлап сығарыу эштәре киң ҡолас йәйә.

Республиканың нефть промыселдәрендә үҙған йылда һәм ағымдағы йылдың беренсе кварталында 676 рационализаторлыҡ тәҡдим индерелгән. Шуларҙан 314 тәҡдим производствоға индерелеп тормошҡа ашырылған. 350 тәҡдим һынау һәм производствоға индереү осорында. «Башнефть» берекмәһе буйынса бер йылға яҡын ваҡыт эсендә производствоға индерелгән 314 тәҡдимдән 2 миллион 890 мең һум аҡсаға экономия яһалған.

Йәйге һауыҡтырыу сезоны башланды

Ныҡлағыҫыларҙың профессиональ союзы ағымдағы йылда Башҡортостан санаторийҙарында һәм Ҡара диңгеҙ буйҙарындағы курорттарҙа ял итеү өсөн 135 кешене путевка менән тәьмин итәсәк.

Өфө узелы тимер юлсылары профсоюзы быйыл тик көньяҡ — Ҡырым һәм Кавказ курорттарына ғына 210 кеше ебәрәсәк.

Райпрофсож балаларҙы йәй көнө ял иттереүҙе тәьмин итеү тураһында ҙур хәстәрлек күрә. Ключерево пионер лагерендә 700 бала ял итәсәк. Бынан башҡа Өфөлә һәм Дим станцияһында яңы балалар майҙансыҡтары ойошторола.

Йәш уҡытыусылар

Республика мәктәптәре ағымдағы йылда күп һанда йәш уҡытыусылар кадрҙарын алалар. Башҡортостан государство педагогия институтын тамамлаған 136 кеше райондарға эшкә китә.

Шулай уҡ башҡаланың уҡытыусылар институтын тамамлаусы 85 уҡытыусы ауыл мәктәптәренә ебәрелә.

БӨГӨН ТЕАТР ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башгосфилармонияла—«ФИАЛКА МОНМАРТРА». Кискә 9 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — «ҘУР ТОРМОШ».

Матросов исемендәге кинола — «ҠЫҘЫЛ ГАЛСТУК».

Благовещендағы ауыл хужалығы мәктәбенә балта оҫталары, мейес сығарыусылар, ташсылар талап ителә.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: БАССР, Благовещен заводы, Киров урамы, 34-се номерле йорт.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00141. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 100
21
май
йома

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВКП(б) Үҙәк Комитеты һәм СССР Министрҙар Советының иптәш Н. М. Шверникты котлауы. (1-се бит).
Иптәш Н. М. Шверникты Ленин ордене менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).
Сәсеү темпын икеләтә-өсләтә күтәрергә! (1-се бит).
И. Перегудов.—Яңы еңеүҙәргә. (2-се бит)
Х. Ҡорбанғулов. — Партия конференцияларының ҡарарҙарын большевиктарса үтәргә. (2-се бит).
ТАСС-тың белдереүе. (2-се бит).
МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. Юғары урожай мастерҙарының тәжрибәләрен киң пропагандаларға. (3-сө бит).
Мәктәптәрҙә экзамендар һәм һынауҙар башланды. (3-сө бит).
Г. Рамазанов, Ш. Бикколов. — Башҡортостанда балет искусство. (4-се бит).
Уоллес әфәнделәрҙең асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндың яуап хаты тураһында. (4-се бит).
Палестинала һуғыш хәрәкәттәре. (4-се бит).

Яҙғы сәсеү һәм ауыл комсомолецтәре

Хәҙер социалистик баҫыуҙарыбыҙҙа мул урожайҙың — сталинсе бишйыллыҡтың өсөнсө һәм хәл иткес йылы урожайының нигеҙе һалына. Яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехника кимәлдә үткәреүҙә партия ойошмаларына эшлекле ярҙам күрһәтеү — бөгөнгө көндә ауыл комсомолының иң мөһим мөктәлле бурысы.

Урожай өсөн көрәштең иң ҡыҙыу осорында Башҡортостан игенселәре бик зур йөкләмәләр алып иптәш Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр. Һәр бер комсомолец һәм комсомолка бөйөк юлбашсыға бирелгән вәғәҙәне үтәү өсөн меңәр көрәшергә, эштәрҙе һәм көрәшергә бурыслы.

Лаштар менән бойлоҙарсе көндән-көн ҡыҙыта барған комсомол ойошмалары һис шикһеҙ зур уңыштарға өлгәшәләр. Маҡар районы комсомол ойошмаларының алдағы быны асыҡ күрһәтә. «Тратау» колхозының комсомол ойошмаһы үҙ членарын бөтә ауыл эштәренә актив ҡатнашыу өсөн ойошторҙо. Ул участкаларында уңышлы эшләйҙәр. Комсомолецтарҙан Ишкулов Шәйхетдин һәм Ишкинин Рәшит иптәштәр сәсеүсе, Хужәхмәтов Абдулат һабансы һәм Кинйәғолов Фәйзрахман тырмасы булып эшләйҙәр. Улар көндәлек эш нормаларын системалы рәүештә 130—200 процентҡа еткереп үтәйҙәр. Бер үк ваҡытта, колхозсылар һәм совхоз эшселәре араһында политик-массовый эш алып барыйҙар. Стена газеталарына, «боевой листоктарға», күрһәтмә таҡталарына комсомолецтар актив яҙышалар. Агитаторҙар игенселәр араһында алдынғыларҙың эш өлгөләрен киң рәүештә популярлаштыралар. Игенселәр художестволы үҙешмәкәрлек түңәрәге баҫыу стандарында системалы рәүештә сығыш яһай. Комсомолецтар эштә алдынғы урынды ала. Массовый-политик һәм ойоштороу эштәрен максатҡа юнәлеш итеп алып барыу колхоз идараларына һәм культураларҙы ваҡытында сәсергә, яҡшы сифатлы итеп тамамларға мөмкинлек бирә.

Ләкин, улар дөрөҫ етәкселек итмәйҙәр, партия тарафынан ҡуйылған бөтә бурыстарҙы ла үтәргә өлгәшмәйҙәр. «Ленин комсомолы һәм уның тарафынан етәкселек ителгән йәштәр,—ти иптәш Сталин,—ярыш йәш ударсылыҡ эшен ойоштороусы һәм тәрбиәләүсе булырға тейеш. Беҙҙең революцион йәштәребеҙ был эштә айырыуса ҙур ролде уйнарға бурыслы». Ҡыҙғаныс хәл, күп кенә комсомол ойошмаларының эше ҡапма-ҡаршы. ВЛКСМ-дың ... райкомы ... тарафынан яҡшылап етәкселек ителмәй, ойоштороу эше тейешле кимәлдә ҡуйылмаған. Бына миҫал итеп ВЛКСМ-дың Бәйбулат райкомын (секретаре иптәш Григорьев) алырға мөмкин. Райком яҙғы сәсеүҙә комсомол ойошмаларын айырыуса, улар эшен һәм ойош-

шон бәлмәй. Комсомол ойошмаларының секретарҙарына практик ярҙам күрһәтмәй. Шуға күрә лә, райондағы комсомолецтарҙың күбеһе юғары урожай өсөн көрәштә ситтә тора. «КИМ» колхозының комсомол ойошмаһындағы 12 комсомолецтан береһе лә баҫыуҙа эшләмәй. Комсомолецтарҙан агитаторҙар ҙа бүленмәгән. Колхозда агитацион-массовый эш алып барылмай. Былда партия ойошмаһы ла юҡ. Шуға күрә колхозда эштең тороһо өсөн яуаплылыҡтың ҙур өлөшө комсомол ойошмаһына төшә. Шулай булғас, ВЛКСМ райкомы был колхоздағы йыл айырыуса нигеҙле иғтибар бирергә, уның эшмәкәрлеген яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙе тәьмин итеүгә юнәлдерергә тейеш ине. Ләкин был эшләнмәне. Һөҙөмтәлә, колхоз яҙғы сәсеүҙә иң артта һөйрәлеүселәрҙән береһе булып ҡалды. ВЛКСМ-дың Нуриман, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ һәм Ҡалтасы райкомдары ла комсомолецтарҙы һәм йәштәрҙе юғары урожай өсөн көрәшкә күтәрә алмайҙар.

Үткән йыл Башҡортостан комсомолы ауыл хужалығын күтәреү өсөн актив көрәште, хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәттең һоҡландырғыс өлгөләрен күрһәтте. Комсомолецтарҙан Гиннат иптәш Насрарова Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеүе, комсомолка звеновоҙтар Санко Ишмөхәмәтова, Мария Чумакова иптәштәрҙең хөкүмәттең юғары наградаһы — Ленин ордене менән наградланыуы, бик күп комсомолецтарҙың һәм йәш игенселәрҙең орден һәм медалдәр алыуы быны асыҡ дәлилләй. Ләкин былар тәүге уңыштар ғына әле. Партия һәм совет халҡы Ленин комсомолынан яңы хеҙмәт батырлыҡтары көтә. Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙә актив ҡатнашып, комсомол был ышанысты аҡларға тейеш.

Комсомол ойошмалары һәр бер йәш игенсенең һәм бөтә колхозсылар массаһының яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп үткәреү өсөн социалистик ярышта актив ҡатнашыуҙарына өлгәшергә бурыслылар. Баҫыу стандарында, трактор бригадаларында, бригада һәм звеноларҙа массовый-политик эш — лекциялар, беседа, ҡысҡырып газета уҡыу, политик информация, стена газеталары һәм «боевой листоктар» социалистик ярыш һөҙөмтәләрен юғары уҡытыу күрһәтеү, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен актыртыу — былар шул максатҡа юнәлдерелергә тейеш.

Комсомолецтар һәм комсомолкалар! Яңы бик юғары урожай өсөн, хәл иткес йылы урожайы өсөн көрәштә алғы сафта булығыҙ! Иптәш игенселәрҙең яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехника кимәлдә үткәреү өсөн фидакәр хеҙмәтенең өлгөһөн күрһәтегеҙ!

БАССР Министрҙар Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде

Районҙарҙың һәм совхоздарҙың майҙың өсөнсө биш көнлөгөндә яҙғы сәсеүҙә социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡарағандан һуң, БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты түбәндәге ҡарар иттеләр:

1. Яҙғы сәсеү планын 53,1 процентҡа үтәгән һәм республикала беренсе урынды алған Туймазы районын (ВКП(б) район комитеты секретары иптәш Баранов, район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Абдуллин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Садиков) яҙғы сәсеү буйынса социалистик ярышта еңеүсе, тип табырға.
БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын Туймазы районында ҡалдырырға.

2. Яҙғы сәсеү планын 49,2 процентҡа үтәгән Балтач районын (ВКП(б) район комитеты секретары иптәш Валишин, район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Абдулов, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Гөрсен) социалистик ярышта икенсе урынды алған, тип табырға. БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын Бакалы районынан алып, Балтач районына бирергә.

3. Яҙғы сәсеү планын 49,1 процентҡа үтәгән Яҡауыл районын (ВКП(б) район комитеты секретары иптәш Ғәләүв, район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Кәримов, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Закиров) социалистик ярышта өсөнсө урынды алған, тип табырға. БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын Ҡандра районынан алып, Яҡауыл районына бирергә.

4. Ҡандра, Бакалы, Салауат, Белорет һәм Дәүләкән райондарының майҙың өсөнсө биш көнлөгөндә яҙғы сәсеүҙә яҡшы эшләүҙәрен билдәләп үтергә.

5. Яҙғы сәсеүҙә совхоздар араһында барған социалистик ярышта һабан ашлыҡ культураларын сәсеү планын 83 процентҡа үтәгән Ылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозын еңеүсе, тип табырға, БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын Ылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозында ҡалдырырға.

Майҙың өсөнсө биш көнлөгөндә Шафиҡ, БашЦИК исемендәге һәм Йәнгил бөртөклө ашлыҡ совхоздарының, Туймазы сусҡасылыҡ совхозының, Аллағуз һәм Дим ит-һөтсөлөк совхоздарының һәм Цюрупа исемендәге совхоздың яҙғы сәсеүҙә яҡшы эшләүҙәрен билдәләп үтергә.

Николай Михайлович Шверник иптәшкә

Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) партияһы Үҙәк Комитеты һәм ССР Союзы Министрҙар Советы, һеҙгә 60 йәш тулған көндә, һеҙҙе ҡайнар ҡотлай.

Большевиктар партияһы тарафынан алдығыҙға ҡуйылған бурыстарҙы намыҫ менән үтәп, һеҙ үҙегеҙҙең бөтә аңлы тормошоғоҙҙо эшселәр синыфы эше өсөн революцион көрәшкә, коммунизм өсөн көрәшкә арнанығыҙ.

Ҡәҙерле Николай Михайлович, һеҙгә оҙаҡ ғүмер һәм беҙҙең бөйөк Тыуған илебеҙҙең бәхете өсөн, совет халҡының бәхете өсөн артабан уңышлы эштәр теләйбеҙ.

ВКП(б) ҮҘӘК КОМИТЕТЫ.

ССР СОЮЗЫ МИНИСТРҘАР СОВЕТЫ.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Николай Михайлович ШВЕРНИККӘ

Ҡәҙерле Николай Михайлович!

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советы Президиумы һеҙгә, иптәш Сталиндың тоғро соратнигына, Совет Государствоһының верховный органы етәксеһенә, һеҙгә 60 йәш тулған көндә, үҙенең бөтә йөрәктән сыҡҡан сәләмен ебәрә.

Иңһ кенә сағығыҙҙан уҡ һеҙ үҙегеҙҙең бөтә тормошоғоҙҙо эшселәр синыфының хеҙмәтсәндәрҙе эксплоатациянан һәм иҙеүҙән азат итеү өсөн булған көрәшенә, коммунизм өсөн көрәшкә арнанығыҙ. Һынаулған большевик булыуығыҙ өсөн партия һеҙҙе государствоның һәм общественың иң мөһим постарына ҡуйҙы. Күп йылдар буйынса һеҙ профессиональ союздарҙың етәксе органы башында булып, эшселәр массаһын сталинсе бишйыллыҡтарҙы уңышлы үтәүгә туплаһығыҙ. Һеҙ халыҡ-ара профсоюз хәрәкәтендә совет профессиональ союздарының достойный вәкиле булып торҙоғоҙ.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һеҙ промышленность предприятиеларын илдең эске райондарына эвакуациялау буйынса промышленносте, төҙөлөштө һәм транспортты эшсе көс менән тәьмин итеү буйынса зур эш башҡарҙығыҙ.

Хәҙерге ваҡытта, беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәренең һәм партияның юғары ышанысына эйә булып, һеҙ Совет Государствоһының верховный органына етәкселек итәһегеҙ.

Һеҙҙең общественный-политик эшегеҙҙең бөтә осоронда беҙҙең илебеҙҙең хеҙмәтсәндәре һеҙҙе үҙ халҡының тоғро улы, социалистик Тыуған илебеҙҙең ҡайнар патриоты итеп беләләр.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советы Президиумы һеҙгә, ҡәҙерле Николай Михайлович, Совет Государствоһын нығытыу буйынса, беҙҙең илебеҙ хеҙмәтсәндәре бәхетенә артабан һөҙөмтәле эш өсөн һаулыҡ-сәләмәт күп йылдар йәшәүегеҙҙе теләй.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Верховный Советы Президиумы.

НИКОЛАЙ МИХАЙЛОВИЧ ШВЕРНИК.

ИПТӘШ Н. М. ШВЕРНИКТЕ ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАУ ТУРАҺЫНДА

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Н. М. Шверниктең тыуыуына 60 йыл тулыу айҡанлы һәм уның партия һәм совет халҡы алдындағы күренекле хеҙмәттәрен иғтибарға алып, Николай Михайлович Шверник иптәште Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателенең Урынбаҫары И. ВЛАСОВ.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль. 18 май, 1948 йыл.

Сәсеү темпын икеләтә-өсләтә күтәрергә!

Стәрлетамаҡ темпты төшөрҙө

СТӘРЛЕТАМАҠ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район май айының икенсе биш көнлөгөндә сәсеү графигын арттырып үтәп, республикабыҙҙа алтынсы урынды алғайны. Ләкин район һәм колхоз етәкселәре был өлгәшеүҙе ныҡытмаһылар, тәүге уңыштар менән тынысланып, баҫыу эштәренә етәкселекте йомшарттылар. Шуның һөҙөмтәһендә өсөнсө биш көнлөктә сәсеү темпы байтаҡ түбәнәйҙе. Район 15 майға сәсеү планын 39,6 процентҡа һәм һөрөү планын 30 процентҡа үтәп, республикала 13-сө урынға төштө.

Районың сәсеү планы быйыл бик күп артты. Быйыл бойҙай культураһы ғына 22 мең гектар майҙанда сәселә. Бына был факт үҙе үк район ауыл хужалығы бүлеге, МТС һәм колхоз етәкселәренән сәсеүҙе икеләтә-өсләтә арттырылған энергия менән алып барыуҙы талап итә. Ләкин иртә культуралар сәсеү өсөн иң яҡшы срокттар үтеүгә ҡарамаҫтан, күпселек колхоздар ашыҡмайҙар, баҫыу эштәрен үткәреүҙә түҙеп торғоһоҙ ғәмһеҙлек күрһәтәләр. «9 Май», «Новый мир», «Муравей» колхоздары иртә культуралар сәсеү планының яртыһын ғына үтәнелар.

Район етәкселәре артта ҡалған колхоздарҙа баҫыу эштәренең нисек барыуы менән аҙ ҡыҙыҡһыналар, уларға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Молотов исемендәге колхозда иртә культуралар сәсеүҙе 6—7 көндә тамамлау өсөн бөтә мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, планың дүрттән бер өлөшө генә үтәлгән. «Рупор» колхозы ла иртә культуралар сәсеү планын 25 процентҡа ғына үтәгән. «Согласие» колхозында 430 гектар һабан ашлығының 74 гектары ғына сәселгән, 320 гектар урынына 83 гектар ер һөрөлгән. Ә колхозда 49 баш эш аты, бер трактор эшләй. Трактор бригадаһы бригадире иптәш Морев үҙ эшенә яуапһыҙ ҡарай. Техник тәрбиә насар булғанлыҡтан, трактор күп ваҡыт ватылып тик ултыра. Заправка өсөн икешәр-өсәр сәғәт ваҡыт үткәрелә. Трактор төндә бөтөнләй эшләмәй. Шуның арҡаһында баҫыу эштәре башланғандан бирле трактор менән ни бары 33 гектар ер һөрөлгән. МТС етәкселәре лә һәм колхоз председателе иптәш Назаров та трактор бригадаһының эшһеҙлегенә илешһен ҡарайҙар, графиктең үтәлеүен талап итмәйҙәр.

«Путь Ленина», «Путь Сталина», «1 Май» колхоздарында ла баҫыу эштәре бик һүлпән бара. Был колхоздарҙы хеҙмәтләндереүсе Стәрлетамаҡ МТС-ының бер генә тракторсе лә смена заданиеһын үтәмәй.

Иртә культуралар сәсеүҙе тиҙ көндә тамамлау өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. МТС-тар колхоздар менән төҙөгән договор буйынса бөтәһе 27 мең гектар ер һөрөргә, 14 мең гектар ашлыҡ сәсергә тейештәр. Ләкин улар договорҙы үтәмәйҙәр. 15 көн эсендә ни бары 3 мең 500 гектар майҙанда ер һөргәндәр, 1 мең 500 гектар ашлыҡ сәскәндәр.

Артабан был хурлыҡлы артта ҡалыуға юл ҡуйылырға тейеш түгел. Стәрлетамаҡ колхоздары баҫыу эштәре темпын күтәреү өсөн бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар.

Г. Ибраһимов.

Картуф ултыртыуҙы тамамланы

«Труд» колхозы картуф һәм һуған ултыртыуҙы, тамыр аҙыҡтары сәсеүҙе Өфө районында беренсе булып тамамланы. Көҙҙән һөрөлгән һәм ашлама индерелгән 23 гектар майҙанда һәр гектарға 18-әр центнер иҫәбенән «Лорх» һәм «Смысловский» сортлы картуф ултыртылды.

Картуфтан юғары урожай алыу өсөн көрәшеүсе А. Д. Филиппова һәм М. А. Владимирова иптәштәр үҙҙәренә беркетелгән берәр гектар майҙанда агротехник талаптарҙы тулыһынса һаҡлайҙар. Улар быйыл һәр гектарҙан 150 — 200-әр центнер яҡшы сортлы картуф алырға һүҙ бирҙеләр.

Г. Ашимов.

Орденле бригадир Черненконың сәсеүлектәрҙе катоклау тәжрибәләре

Ефим Иванович Черненко 8-се йыл инде Стәрлетамаҡ районы Шевченко исемендәге колхозда баҫыусылыҡ бригадаһының бригадире булып эшләй. Ул 1947 йылда 20 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 25 центнер урожай алғаны өсөн Ленин ордене менән наградланды.

Иптәш Черненко игенселек эшендә тәжрибәле бригадир ул. Уны колхозда «беҙҙең агроном — консультант» тип йөрөтәләр. Был бригада ҡулланған агротехник саралар араһында, сәсеүлектәрҙе катоклау мөһим урын алып тора.

— Сәсеүлектәрҙе катоклауҙы беҙ бик киң ҡулланабыҙ. Был сара бик яҡшы, шул уҡ ваҡытта урожайҙы күтәреүгә зур ярҙам итә. Сәсеүлектәрҙе катоклау аша йыл һайын тиерлек, һәр бер гектар ерҙән кәмендә 2—3 центнер өҫтәмә урожай алып киләбеҙ,—тип һөйләй, иптәш Черненко.

Сәсеүлектәрҙе катоклауҙың агротехник әһәмиәте бик ҙур. Беренсенән, ул ер өҫтөн бер аҙ тығыҙландырыу арҡаһында, аҫтағы дымды орлоҡ ятҡан ҡатламға бик ныҡ күтәрә. Икенсенән, катокланған ер өҫтө 2—3 градусҡа тиклем йылыраҡ була. Ошо арҡала орлоҡтар ерҙән берҙәм рәүештә 3—4 көнгә иртә шытып сығалар. тиҙ һәм ныҡ тамыр йәйәләр, бер үҫеү фазаһынан икенсе үҫеү фазаһына тиҙ күсәләр, иртәрәк өлгерәләр. Һөҙөмтәлә бындай сәсеүлектәр 2—3 центнер, ә тары 6—8 центнерға тиклем өҫтәмә урожай бирә.

Быйыл яҙ һуңлап килгән шарттарҙа, ерҙә дым запасы ла артыҡ күп булмаған саҡта, сәсеүлектәрҙе массовый рәүештә катоклау мөһим агротехник сара булып тора.

Иптәш Черненко үҙенең участкаһында катоклау эшен ашлыҡты сәскәнсе лә һәм сәсеп бөткәс тә үткәрә. Беҙ, күп һандағы тәжрибәләргә таянып, был эште сәсеүҙән һуң бер ҡат ауыр катоктар менән үткәреү етәсәк, тип иҫәпләйбеҙ. Уны сәсеү артынан уҡ үткәрә торорға кәрәк. Был сара бигерәк тә яҙ һөрөп сәселә торған ерҙәргә күп файҙа бирәсәк. Трактор сәскестәре менән сәскәндә, катоктарҙы сәскестәргә тағып бер агрегат менән эшләтеү файҙалы буласаҡ. Беренсе нәүбәттә катоклауҙы бойҙай сәсеүлектәрендә, орлоҡ участкаларында үткәрергә кәрәк. Быйылғы шарттарҙа катоклау эше Башҡортостандың бөтә райондарында ла тиерлек, бигерәк тә уның ялан һәм ярым урман-ялан райондарында күп файҙа килтерәсәк.

Агроном В. Ғирфанов.

Тиҙ һәм яҡшы сәсәләр

Матрай районы Ворошилов исемендәге колхоз яҙғы сәсеүҙе уңышлы тамамлау өсөн бөтә сараларҙы күрә. Барлыҡ эшсе һәм тартыу көстәре баҫыуҙа файҙаланыла. Колхозсылар иртәнге ҡараңғынан, кискә ҡараңғыға тиклем баҫыуҙа ярышып эшләйҙәр. Сәсеүсе Лаврентьев, Перетин, тырмасы Мастеренникова, Днсокова, Шелкова, Бабушкин иптәштәр һәр көн нормаһы арттырып үтәйҙәр. Район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алған колхоз, уны сәсеүҙе тамамлағанға тиклем үҙ ҡулында тотоу өсөн көрәшә. Бында инде яҙғы сәсеү майҙанының дүрттән өс өлөшө күләмендә ашлыҡ сәселде.

Р. Шафикова.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ ЛЕНИН ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН НЕФТСЕЛӘРЕ

Һүрәттә (һулдан уңға): Е. В. Варенов — «Туймазынефть» тресы икенсе номерлә промыселенең нефть сығарыу мастеры. Т. М. Золоев — «Туймазынефть» тресының баш геологы. М. В. Мальцев — «Туймазынефть» тресының бүлек начальнигы. М. А. Потюкаев— «Туймазынефть» тресының беренсе номерлә бораулау конторaһы директоры. А. А. Трофимук — «Башнефть» берекмәһенең баш геологы, Социалистик Хеҙмәт Геройы.

Л. Якубов фотоһы.

Яңы еңеүҙәргә

«Ишембайнефть» тресының икенсе промыселе коллективы үҙенең производство планын айҙан-айға, йылдан-йылға арттырып үтәй. Һуғыштан һуңғы сталинсе яңы биш йыллыктың ике йылында ул Тыуған илебеҙгә пландан тыш күп меңләгән тонна нефть бирҙе. Коллектив 1948 йылда ла үҙенең намыҫлы хеҙмәте менән нефть сығарыу темпын түбәнәйтмәй һаклап килә. Ағымдағы йылдың дүрт айлык планын промысел газ һәм нефть сығарыу буйынса 101,5 процентка үтәне. Был, һис һүҙһеҙ, коллективтың ойошкан рәүештә, берҙәм эшләүе менән тәьмин ителде.

Беҙҙең нефтселәребеҙ үҙ эштәрен һәйбәт башкаралар һәм үҙҙәренең квалификацияларын күтәреү өҫтөндә ныкышмалы эшләйҙәр. Бөтә операторҙар, ер аҫты ремонты эшселәре лә стахановсы мәктәпте тамамлап, хәҙер яңы программа буйынса техминимум мәктәптәрендә укыйҙар. Мәктәпкә операторҙарҙан 96 кеше, ер аҫты ремонты эшселәренән — 34, электромонтерҙарҙан — 18 кеше укыуға йөрөй. Үҙ эшен яратып, үҙенең Тыуған иле алдындағы изге бурысын яҡшы аңлаған эшсе производство пландарын даими үтәй бара. Беҙҙең промысел коллективы шулай. Беҙҙә нормаһын үтәмәүсе бер генә эшсе лә юк. Ошо нигеҙҙә беҙ ойоштороу-техник планда каралған сараларҙы байтак арттырып үтәй алдык. Хәҙер скважиналарҙы эксплоатациялау коэффициенты 0,92 урынына 0,96-ға еткерелде. Бында Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелгән өлкән мастер Акмал Вахитовтың һалған хеҙмәте ҙур.

Быйыл эшләмәй торған ун скважинаны кинәнә эксплоатацияға бирҙек. 20 скважинаға тоҙ кислотаһы менән эшкәртеү үткәрелде. Ошо юл менән тик 12/12-се скважина ғына дүрт ай эсендә 250 тонна өҫтәмә нефть алыуға мөмкинлек бирҙе. Кырк скважинаға куйылма насос урынлаштырылып, эшкә күп уңайлык тыуҙырылды. Һәр скважинаға ремонт үткәргәндә 16 сәғәт вакытка экономия яһала. Ошолар һөҙөмтәһендә нефттең үҙенә төшөү хакы 50 процентка түбәнәйтелде.

Һуңғы вакытта беҙ өҫтәмә рәүештә ун дүрт скважинаны газ сығарыуға кулайлаштырҙык. Дүрт айҙа газ сығарыу буйынса план 107,7 процентка үтәлде. Үрҙә әйтелеп үтелгән бөтә был саралар беҙгә ағымдағы йылдың беренсе кварталында 295 мең һум экономия яһау мөмкинлеген бирҙе.

Партия һәм хөкүмәтебеҙ нефтселәрҙең фиҙакәр хеҙмәтен юғары баһаланы. Өлкән мастер Акмал Ғилфан улы Вахитовка Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, мастер Сәетов, Серков иптәштәр орденләр менән наградланды. Коллектив юғары наградаға лайыҡлы булған кешеләре менән ғорурлана. Был беҙҙе яңы еңеүҙәргә рухландыра. Ошо айканлы коллектив йыллык нефть сығарыу планын 102, ер аҫты ремонтлаусылары планды 125 процентка үтәргә йөкләмә алдылар. Беҙ был йөкләмәбеҙҙе лә намыҫ менән үтәрбеҙ. Тыуған илебеҙгә тағы ла күберәк нефть биреп, юғары награданы стахановсы хеҙмәт менән аклар быҙ.

И. Перегудов.

«Ишембайнефть» тресының икенсе промыселе директоры.

Дотацияһыҙ эшләй

«Автотракторадеталь» заводы ҙур түгел. Ләкин ул Белорет калаһындағы башка заводтар араһында үҙенең һәр-вакыт алдынғы булыуы, производство пландары өсөн көрәштә юғары ойошканлык күрһәтеүе менән айырылып тора. Завод 1947 йылдан башлап хөкүмәттән дотация алмайынса эшләп килә. Үткән йылдың планы ике ай ярымға срогынан алда үтәлде. Завод государствоға 2 миллион һум экономия килтерҙе. Пландан тыш 4 миллион 200 мең һумлык продукция бирелде. Эшләп сығарылған продукцияның үҙенә төшөү хакы планда билдәләнгәнгә карағанда 10,2 процентка кәметелде. Завод ағымдағы йылда ла яҡшы эшләй.

Завод коллективы үҙенә тапшырылған бурысты үтәүҙә көсөн аямай.

Быйыл завод үҙенең экономикаһын тулы тәртипкә килтерҙе. Беренсе тапкыр булараҡ заводтың стахановсы-экономик планы төҙөлдө һәм был план завод коллективының производство кәңәшмәһе менән кабул ителгән. Ошо пландың үтәлеше, заводка быға тиклем булмаған дәрәжәлә юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫешен бирәсәк. Сәнки ошо план буйынса заводтың барлык эш тармактары ла хеҙмәт етештереүсәнлектәрен артабан үҫтереү, яғыулык һәм башка материалдарға каты экономия булдырыу, әҙерләнгән продукцияның үҙенә төшөү хакын кырка кәметеү өсөн көрәшәсәктәр. Завод коллективы үҙ алдына, сталинсе яңы биш йыллыкты ес йыл 8 ай вакыт эсендә үтәп сығыу бурысын куйған. Беренсе башлап заводта уның беренсе номерле ҙур цехе хужалык иҫәбенә күсерелде. Яҡын киләсәктә калған цехтар ҙа хужалык иҫәбенә күсәләр.

М. Хәйҙәров.

☆

Республикала „Урман аҙнаһы" үткәреүҙә бер миллион кеше катнашты

Республикала үткәрелгән «Урман аҙнаһы» тамамланды. Был аҙнала калаларҙы, ауылдарҙы йәшелләндереүҙә, яландарға, урман участкаларына агас ултыртыу, агас орлоғо сәсеү эшендә һәм шулай ук питомниктәр, баҫыу һаклау полосаларын аякка баҫтырыуҙа бер миллионға якын кеше катнашты.

Аҙна эсендә ғәйәт ҙур эштәр башкарылды. Республиканың урман хужалыктары 5 майҙан 12 майға тиклем 3000 гектарға якын майҙанда каййын, имән, саған, уҫак һәм башка агастар ултырттылар, 500 гектар майҙанда агас орлоктары сәстеләр. 100 гектарҙан артык участкала ҙелпе, тополь плантацияларын һәм питомниктәре аякка баҫтырылды. Былардан башка 1600 гектарҙан артык майҙанда элекке йылдарҙа ултыртылған агас культуралары яңыртылды.

«Урман аҙнаһында» колхоздар һәм совхоздар массовый рәүештә катнаштылар. Улар үҙҙәренә билдәләнгән агротехника сараларын комплексен үтәү максатында баҫыуҙарға һигеҙ йөҙ гектарҙан артык майҙанда агас ултырттылар.

Аҙна Красный ключ, Ауырғазы, Бәләбәй, Өфө урман хужалыктарында, ә баҫыу һаклау полосаларын аякка баҫтырыу буйынса Шишмә, Воскресен, Әлшәй районларында айырыуса ойошканлык менән үткәрелде. Мәҫәлән, Ауырғазы урман хужалығының Боҙаяз лесничествоһы, утыҙ йыл урмансы булып эшләүсе Алексей Борисович Мясько етәкселегендә, агас ултыртыу планын күп арттырып үтәне.

Хеҙмәтсәндәр калаларҙы, ауылдарҙы, МТС һәм совхоздарҙы йәшелләндереүҙә киң күләмдә катнаштылар.

Тик бер Өфө калаһын йәшелләндереү буйынса ғына үткәрелгән аҙнала һәр көн 800 — 1000 кеше катнашты. Урамдарға, скверҙарға, бульварҙарға һәм баксаларға 100 мең төпкә якын кырағай һәм емеш агастары ултыртылды.

Агас ултыртыу күп районларҙа, калаларҙа һәм ауылларҙа дауам итә.

Х. Рәфиков.

☆

Йылға биш миллион кирбес

Өфөләге 1-се номерле кирбес заводында 3-сө цех тотошо менән механизациялаштырылды, эксплоатацияға тапшырылды. Цехта кирбес киптереү мейестәре, карьерҙарҙан балсык һәм ком алыу өсөн махсус машиналар, экскаваторҙар булдырылды.

Был цех йылына биш миллион кирбес эшләп сығарасак. Завод коллективы был [illegible] 4 миллион кирбес бирергә һүҙ итеп куйҙы һәм 1 майға 200 мең дана кирбес эшләп сығарҙы.

ТАСС-тың белдереүе

ТАСС АКШ Государство департаментының (сит ил эштәре министерствоһының) кисә матбуғатта иғлан ителгән белдереүе тураһында, СССР-ҙың етәксе крутттарының фекерен белдереү мөмкинлегенә эйә.

И. В. Сталиндең АКШ хөкүмәтенә индәй ҙә булһа тәкдим менән официаль рәүештә мөрәжәғәт итмәйенсә, 17 майҙа яҙған хатында бары тик Г. Уоллестең Асыҡ хатына яуап кына биреүенә карамаҫтан, АКШ Государство департаменты Г. Уоллеска И. В. Сталиндең яуабы айканлы матбуғатта махсус белдереү яһауҙы кәрәк, тип тапты.

Государство департаменты, бер яктан, хәл ителмәгән мәсьәләләрҙе дөйөм тыныслык интерестәре өсөн тыныс юл менән регулировать итеү мөмкинлеге һәм кәрәклеге тураһында И. В. Сталин белдереүенең әһәмиәтен таный. Икенсе яктан, Государство департаменты, И. В. Сталин яуабында һаналған конкрет мәсьәләләр АКШ менән СССР араһында ике яклап тикшереү предметы булып хеҙмәт итә алмайҙар, ә башка илдәр катнашлығында, мәҫәлән, Берләшкән милләттәр ойошмаһында атом энергияһы өҫтөнән контроль тураһындағы мәсьәләне тикшереү, шулай ук Сит ил Эштәре Министрҙәре Советында мәсьәләләрҙе тикшереү, имеш, Советтар Союзы тоткан позиция аркаһында ыңғай һөҙөмтәләр бирмәне, тип белдерә.

Государство департаментының белдереүе беҙҙә ғәжәпләнеү тыуҙыра.

Государство департаментының был позицияһы АКШ хөкүмәтенең 4 майҙа яһаған белдереүенә бөтөнләй капма-каршы тора, был белдереүҙә ике яклы һөйләшеүҙәрҙең мөмкин икәнлеге инкар ителмәне, ә, киреһенсә, үҙенән-үҙе кәрәкле тип танылды, сөнки улай булмағанда АКШ хөкүмәте фекер айырымлыктары мәсьәләләрен регулировать итеү теләге тураһында белдереү менән Совет Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итеүҙе мөмкин тип иҫәпләмәҫ ине.

Бынан тыш, билдәле булғанынса, халык-ара мәсьәләләрҙең иң ҙурҙары Рузвельт хөкүмәте вакытында АКШ, СССР һәм Бөйөкбритания вәкилдәре тарафынан тулыһынса үҙ-ара килешеү юлы менән һәм берҙәм рәүештә өс йылдан артык вакыт буйынса хәл ителә килделәр. Ни өсөн хәҙер державалар араһындағы яңы, кыйынлығы аҙыраҡ булған мәсьәләләрҙе үҙ-ара килешеп хәл итеүҙе мөмкин түгел, тип иҫәпләйҙәр? — тигән һорау килеп тыуа. АКШ-тың хәҙерге хөкүмәте Рузвельт политикаһынан ситкә киткәнлектән һәм башка политика үткәргәнлектән түгелме икән?

Совет общественносе, килеп тыуған хәлдә АКШ-тың хәҙерге хөкүмәте тоткан агрессив позицияһының һөҙөмтәһе булып тора, тип иҫәпләй.

Өфө кала Советы исполкомының дүртенсе сессияһы

18 майҙа Башкортостан государство филармонияһы бинаһында Өфө кала Советы исполкомының дүртенсе сессияһы булып үтте. 1947 йылғы бюджеттың үтәлеше һәм 1948 йылғы бюджет тураһында кала финанс бүлеге мөдире иптәш Борота доклад яһаны.

Докладсы 1947 йылдың бюджетен үтәүҙә ҙур ғына уңыштарға өлгәшеү менән бергә күп кенә етешһеҙлектәрҙе лә асып бирҙе. Мәҫәлән, план буйынса каралған 75 миллион 205 мең һумлык бюджет 79 миллион 143 мең һумға үтәлгән. Шул ук вакытта коммуналь һәм кайһы бер башка предприятиелар бюджет буйынса каралған доходтарын үтәй алмағандар. Водоканалтрест йыл буйы [illegible] планын ни бары 10 процентка ғына үтәгән. Шуның аркаһында ул, 855 мең һум ҙыян күргән. Мунса-кер йыуыу тресы, трамвай управлениеһы [illegible] доходтарын үтәй алмағандар, [illegible] һөҙөмтәһендә государство иҫәбенә йәшәп киләләр.

Кала сауҙаһы буйынса каралған доход 15 процентка артығы менән үтәлгән, ләкин накоплениелар планы 3 процентка үтәлеп еткерелмәгән.

Каланың урындағы промышленносе гөмүмән алғанда планын арттырып үтәй, ләкин Киров һәм Дим районындағы промкомбинаттары производство заданиеларын айҙан-айға үтәй килмәйҙәр.

— Кала Советенең исполкомы 1948 йыл өсөн билдәләнгән бюджетте үткән йылғы кайһы бер етешһеҙлектәрҙе кабатламау һәм [illegible], — ти иптәш Борота.

1948 йылға төҙөлгән бюджет доходтар өлөшө буйынса 77 миллион 730 мең һум һәм расходтар өлөшө буйынса 76 миллион 221 мең һум күләмендә [illegible].

Доклад буйынса 9 кеше сығыш яһаны. Улар кала бюджетенең үтәлешендә күп етешһеҙлектәрҙе астылар һәм уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәттеләр.

Сессия 1948 йыл өсөн каралған бюджетте раҫланы.

И. Ингмәтуллин.

Заводтың алдынғы электросварщиге

Павел Алексеевич Попов Өфө тау оборудованиеһы заводының алдынғы электросварщиге. Ул социалистик ярышта алған йөкләмәһен уңышлы үтәй. Биш йыллык планды 15 апрелгә үк тамамланы.

Заводта эшләй башлаған вакыттан алып, ул уйлаған кешене электросварщиклек эшенә өйрәтте. Уның өйрәнселәренән Рузанов, Ящук иптәштәр хәҙер һәр көндә ике ярымшар норма бирәләр.

Иптәш Поповка заводтың иң алдынғы электросварщиге исеме бирелде.

Партия конференцияларының карарҙарын большевиктарса үтәргә

Булып үткән отчет-һайлау йыйылыштары һәм партия конференциялары партия ойошмаларының эшен байтак уҡ яҡшыртыуға ярҙам итте. Күп кенә партия ойошмалары үҙ эштәрен уңышлы рәүештә кайтанан кора алдылар һәм политик етәкселектең кимәлен күтәрҙеләр. Быны яҙғы сәсеүҙе уңышлы алып барыусы Бөрө, Яңауыл, Туймазы һәм башка кайһы бер районларҙың миҫалында күреп була. Ләкин кайһы бер партия ойошмаларының үҙ эштәрен тәнкыйтләнерәк рәүештә кайтанан кора алмауҙарын, отчет-һайлау йыйылыштарының һәм партия конференцияларының карарҙарын насар үтәүҙәрен әйтергә кәрәк.

Отчет-һайлау йыйылыштарында һәм партия конференцияларында төп иғтибар совет, хужалык ойошмаларына партия етәкселегенең методын яҡшыртыуға, уларҙың эшмәкәрлегенә контролде көсәйтеүгә, кешеләр менән эшләүҙе юлға һалыуға йүнәлдерелгәйне. Партия ойошмалары совет һәм хужалык органдарының эшенә политик етәкселек итеү органы булып әүерелергә тейеш инеләр. Партияның район һәм кала конференциялары тәүге партия ойошмаларының эшен йәнләндереүҙе, партияның эске эштәренең кимәлен күтәреүҙе, хеҙмәтсәндәр менән бәйләнеште нығытыуҙы талап иттеләр.

Партия ойошмаларында отчет-һайлау йыйылыштары, һәм конференциялары тамамланғандан һуң 3 айҙан артык вакыт үтеп китте. Шулай ҙа, кайһы бер райкомдар тейешле һығымта яһамаһылар һәм иҫке методтар менән эшләүҙәрен дауам итмәләр әле. Йыш кына хужалык ойошмаларының функцияларына инәләр, уларҙың эштәрен башкаралар.

ВКП(б)-ның Байкыбаш райкомы бюроһының һөт һауыусыларға хеҙмәт хакы түләү, район үҙәгенә төҙөү материалы ташыу өсөн аттар бүлеү шикелле хужалыктың вак мәсьәләләре менән ошо көнгә тиклем шөғөлләнеүен нормаль хәл тип, иҫәпләп булмай. ВКП(б)-ның Воскресен һәм башка райкомдары ла бындай вак мәсьәләләрҙе тикшереп, күп вакытты юғалталар.

Партия конференцияһында Воскресен райкомының секретаре иптәш Ваврук һәм башка работниктар тәүге ойошмалар менән эште яҡшыртырға, уларға көндәлек ярҙам күрһәтергә, район Советы башкарма комитетенең һәм уның бүлектәренең авторитетен кырка күтәрергә һәм уларҙың етәкселек эштәренең кимәлен күтәрергә делегаттарға һүҙ биргәйнеләр. Воскресен райкомы үҙенең практик эшендә конференция карарҙарын һәм бирген вәғәҙәләрен насар үтәй әле. Партияның район конференцияһы йомғактары тәүге партия ойошмаларының йыйылыштарында тикшерелмәгән. ВКП(б) райкомы конференция карарҙарын тормошка ашырыу сараларын да билдәләмәне. Был хәл партия эшенең торошона йоғонто яһамайынса калманы. Бында коммунистар яҙғы сәсеүҙең яуаплы участкаларына урынлаштырылмағандар. Ауылдарҙағы 180 коммунистан звеновод, һөрөүсе, сәсеүсе булып 26 ғына кеше эшләй. Айырым партия ойошмаларында коммунистарҙың күпселек өлөшө колхоз производствоһында катнашмай. Йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшенең кимәле бик түбән. Ә конференция был мәсьәләгә айырыуса нык иғтибар биргәйне һәм күп кенә практик тәкдимдәр индергәйне. Райком совет аппараттарындағы партия ойошмаларына ярҙам итмәй, уларҙың иғтибарын хеҙмәткәрҙәр араһында эшләүгә, бюрократизм, волокитаға карышы көрәшкә йүнәлдермәй.

Отчет-һайлау йыйылыштарының, партия конференцияларының карарҙарын бер һүҙһеҙ үтәү — партия эшендә закон булып тора. Бер генә карар ҙа, делегаттарҙың бер генә тәкдиме лә үтәлмәйенсә калырға тейеш түгел. Совет һәм хужалык ойошмаларының, ер органдарының эшен яҡшыртыуҙа ВКП(б)-ның район һәм кала комитеттарына айырыуса ҙур яуаплылык төшә. Совет һәм ер органдарының бөтә хужалык мәсьәләләрен үҙҙәренең хәл итә белеүҙәренә өлгәшергә кәрәк.

Кала һәм район комитеттарының бюро ултырыштары хужалыктың айырыуса актуаль, перспектив мәсьәләләрен генә тикшерергә бурыслылар. Партия ойошмаларының эше, коммунистарҙе политик, идеологик яктан тәрбиәләү, партия һәм хөкүмәт карарҙарының үтәлешен тикшереү кеүек мәсьәләләр кала һәм район комитеттары бюроһының эшендә үҙәк урынды алып торорға тейеш.

Күп кенә ВКП(б) райкомдарының ауыл хужалығы һәм финанс бүлеге коллективтарының һәм район Советы башкарма комитетының, уларҙағы тәүге партия ойошмаларының эше менән кыҙыкһынмауҙары нормаль хәл түгел. Шуның кеүек учреждениеларҙағы партия ойошмаларының айҙар буйына йыйылыштары ла үткәрелмәй. Район Советы башкарма комитеттарындағы һәм уларҙың бүлектәрендәге партия ойошмаларының эшенә күберәк иғтибар бирергә, совет хеҙмәткәрҙәрен тәрбиәләү, бюрократизм фактыларын, волокитаны бөтөрөү, аппараттың аныҡ һәм оператив эшләүе өсөн көрәштә уларға ярҙам итергә кәрәк. Башкарма комитеттарҙың ултырыштарында райком секретарҙәренең катнашыуҙары был органдарҙың эшен тәрәнтен өйрәнергә, вакытында тейешле ярҙам күрһәтергә һәм уларҙың авторитеттарын күтәрергә мөмкинлек биреүен әйтергә кәрәк.

Партияның район һәм кала комитеттары Советтарҙың һәм уларҙағы даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың эштәрен яҡшыртыуҙа райсовет башкарма комитеттарына ярҙам итергә тейештәр. Советтарҙың массовый эштәрен быға тиклем булған түбән кимәлдә калдырырға һис тә ярамай.

Тәүге партия ойошмаларының етәкселек итеү эшен яҡшыртыу партия конференцияларының мөһим талабы булды. Был тәңгәлдә күп кенә эш башкарылды, ләкин алда тағы ла ныҡыраҡ эшләйһе бар әле. Райком секретарҙәре үҙҙәренең инструкторҙарынан тәүге партия ойошмаһы секретарҙәрен эшкә өйрәтеүҙе, практик ярҙам күрһәтеүҙе етерлек тиклем талап итмәйҙәр. Күп райкомдар инструкторҙарҙы һаман да дөрөҫ файҙаланмайҙар, уларҙы айырым колхоздарға даими вәкил итеп беркетәләр.

Райкомдарҙың инструкторҙары һәм бөтә партия активы хужалык пландарының үтәлеүе өсөн ҙур яуаплылар. Ләкин партияның уларҙы хәл итеүҙә үҙенең айырым методтары бар. Инструктор тәүге партия ойошмаһының производствоға етәкселеген яҡшыртыу, коммунистарҙың яуаплылығын һәм авангардлыҡ ролдәрен күтәреү менән шөғөлләнергә тейеш. Инструктор үҙенә беркетелгән партия ойошмаларының тулы канлы тормош менән йәшәүҙәренә, производствоның торошо өсөн тулы яуаплылык тойоуҙарына, масса араһында политик эште киң йәйелдереүҙәренә һәм политик эште хужалык эше менән дөрөҫ ярраштырып алып барыуҙарына өлгәшергә тейеш. Ә инструкторҙарҙың оҙак срокка айырым колхоздарға вәкил итеп беркетелеүҙәре уларҙы партия ойошмаларының эшенә йоғонто яһау мөмкинлегенән мәхрүм итә.

Партия конференциялары ВКП(б) райкомдарынан йәш коммунистарҙы тәрбиәләү эшен юлға һалыуҙы талап итте. Ләкин был тәңгәлдә күҙгә күренерлек алға китеш булғаны юк әле. Коммунистарҙы тәрбиәләү буйынса бик нык эшләйһе бар. Йәш коммунистарҙы тәрбиәләү мәсьәләләрен бюро ултырыштарында, пленумдарҙа систематик рәүештә тикшереп барған ВКП(б)-ның Стәрлетамак кала һәм Туймазы район комитеттары әлегеләндә партия комитеттары коммунистарҙы политик тәрбиәләү эшен серьез яҡшыртырға, партия мәғрифәтендәге етешһеҙлектәрҙе ашығыс рәүештә бөтөрөргә һәм большевистик тәрбиә мәктәбе булыу ярамлан партия йыйылыштарының әһәмиәтен күтәрергә тейештәр. ВКП(б) членлегенә кандидаттарҙы тәрбиәләүгә айырыуса нык иғтибар бирергә кәрәк.

Партия конференциялары партия-политик һәм партия-ойоштороу эштәрен яҡшыртыуға йүнәлдерелгән бик күп карарҙар кабул иттеләр. Партия ойошмалары был карарҙарҙың һәр бер пунктын аныҡ үтәүҙе тәьмин итергә тейештәр.

Партияның район һәм кала комитеттары конференция карарҙарын тормошка ашырыу буйынса ныҡлы уйлап төҙөлгән ойоштороу саралары билдәләргә һәм, шул нигеҙҙә, партияның бөтә эшен кайтанан корорға тейештәр.

Хәҙер партия эшендә төп иғтибарҙы ауыл хужалығын күтәреү буйынса иптәш Сталинга яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе һәм промышленноста яңы биш йыллыктың өсөнсө йылык планын һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итеүгә йүнәлдерергә кәрәк.

Х. Корбангулов,
ВКП(б) Өлкә Комитетының ойоштороу-инструкторлык бүлеге мөдире.

Матбуғат күҙәтеү

Юғары урожай мастерҙарының тәжрибәләрен киң пропагандаларға

Баймаҡ районында күп кенә алдынғы колхоздар һәм юғары урожай өсөн көрәштә яҡшы күрһәткестәргә ирешкән колхозсылар һәм МТС, совхоз работниктары бар. Юғары урожай мастерҙарынан Ыҫлайыр бөртөклө орлоҡ колхозының алдынғы комбайнеры ..., Карл Маркс исемендәге колхоздың звеноводы Насиров иптәштәргә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Район буйынса уҙған йылда юғары урожай алыуға ирешкән 60-тан артыҡ кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды. Уларҙың һәр ҡайһыһының һоҡландырғыс эш күрһәткестәре бар. Мәҫәлән, Карл Маркс исемендәге колхозда Ғиниәт Насиров етәкселек иткән звено уҙған йылда 11 гектар майҙандағы арыштың һәр бер гектарынан 30,7 центнер урожай алды. «Красная дружина» колхозы 40 гектар бойҙай майҙанының һәр бер гектарынан 26-шар центнер урожай алыуға иреште.

Хәҙер юғары урожай мастерҙарының эш тәжрибәләрен киң рәүештә пропагандаларға, ошо алдынғы тәжрибәләрҙе ҡулланып, быйыл колхоздарҙың тотош майҙандарҙан юғары урожай алыуҙарына ирешергә кәрәк.

«Ҡыҙыл Баймаҡ» газетаһы (ВКП(б)-ның Баймаҡ райкомы органы) үҙенең 26 апрель башмәҡәләһендә:

«Ауыл хужалығы алдынғыларының тәжрибәләре ҙур. Уларҙы колхоз производствоһына индереү ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙә иң мөһим сара булып тора» — тип яҙҙы.

Был бик дөрөҫ әйтелгән. Ләкин газета алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалау буйынса үҙе нисек эшләй һуң? Һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. «Ҡыҙыл Баймаҡ» газетаһы Фрунзе һәм Куйбышев исемендәге колхоздарҙың сәсеүгә әҙерлек буйынса байтаҡ уңышлы эштәре тураһында быйыл ғинуар айында 2—3 материал урынлаштырҙы ла, шунан һуң алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен яҡтыртыуҙан бөтөнләй туҡтаны. Ул хатта ауыл хужалығы алдынғыларын наградлау тураһындағы Указды иғлан иткәс тә, юғары урожай мастерҙарының тәжрибәләрен киң рәүештә пропагандалаусы мәҡәләләр, очерктар бирмәйенсә, формаль рәүештә яҙылған информациялар менән генә сикләнде.

Бына «Ҡыҙыл Баймаҡ» газетаһының 15 апрель номеры. «Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙең мөһим шарты» — тигән башмәҡәләлә һүҙ, башлыса, колхоздарҙа даими звеноларҙы нығытыу тураһында бара.

«1948 йылда беҙҙең районда 150-нән артыҡ звено ойошторолдо,—тип әйтелә башмәҡәләлә.— Звеноларҙы дөрөҫ ойоштороуҙың әһәмиәтен яҡшы аңлаған колхоз председателдәре һәм тәүге партия ойошмаһы секретарҙары был өлкәлә яҡшы уҡ уңыштарға ирештеләр».

Ниндәй уңыштарға ирештеләр? Редакция даими звеноларҙың эштәрен белмәй. Шуға күрә ул башмәҡәләлә миҫал өсөн бер генә звеноның да эшен күрһәтә алмаған. Ләкин быйыл юғары урожай яулап алыу өсөн ҡыштан уҡ бик сериоз көрәш башлаған звенолар күп бит. Мәҫәлән, «Красная дружина» колхозында Тимофеев Андрей һәм Морозов Николай етәкселек иткән звенолар 11-әр гектар майҙандағы бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 32-шәр центнер урожай алыу өсөн көрәшәләр. «Урғаҙа» колхозында орденле Янаһин Аллабирҙе етәкселек иткән звеноның члендәре быйыл 15 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 15-шәр центнер, ә 5 гектар майҙандағы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алырға һүҙ бирҙеләр. Был йөкләмәләрҙең алыныуы тураһында газетала информация булды. Звенолар алған йөкләмәләрен үтәү буйынса хәҙер бик ҙур эш алып баралар, ләкин «Ҡыҙыл Баймаҡ» редакцияһы уларҙы күрмәй, йөкләмәләрҙең үтәлеше менән ҡыҙыҡһынмай, ярыш алдынғыларын һәм уларҙың эш тәжрибәләрен күрһәтмәй. Газетаның 1—5 май номерҙарында звеноларҙың, шулай уҡ юғары урожай мастерҙарының эштәренә ҡағылышлы бер генә материал да урынлаштырмаған.

Ауыл хужалығы алдынғыларының эш тәжрибәләрен пропагандаламау — «Ҡыҙыл Баймаҡ» редакцияһының эшендә иң сериоз кәмселек булып тора. Был хәл газетаның ойоштороусылыҡ ролен түбәнәйтеүгә, уның тәьҫир итеү көсөн кәметеүгә килтерә. Бигерәк тә хәҙер, юғары урожай өсөн көрәштең бик яуаплы осоро булған яҙғы сәсеү ваҡытында, газетаның бындай хата позицияла тороуы һис юл ҡуйғыһыҙ эш.

Социалистик ярыш алдынғыларының тәжрибәләрен нисек итеп популярлаштырырға кәрәк икәнлеген күрһәтеү өсөн «Сталин юлы» газетаһының (ВКП(б)-ның Йәрмәкәй райкомы органы) 11 майҙа сыҡҡан бер номерена туҡталырға мөмкин. Бында һүҙ «Яңы тормош» колхозы тураһында бара. Был колхозда яҙғы сәсеү эштәре башҡа колхоздарға ҡарағанда байтаҡ уңышлыраҡ ойошторолған, колхозсылар, бөтәһе лә, юғары урожай алыу өсөн ныҡлы көрәш алып баралар. Бындағы тәжрибәләрҙе башҡа колхоздарға ла күсереү маҡсаты менән, редакция «Яңы тормош» колхозы тураһында бер бит ойошторҙо. Унда колхоз председателе М. Фәхриев, тәүге партия ойошмаһы секретары З. Ғәйнуллин, трактор бригадаһы бригадиры Х. Ғөбәйҙуллин, звеноводтар И. Насриев, Р. Ғәниева, сәсеүсе М. Ҡашапов, һабансы Ә. Ғәзизуллин иптәштәрҙең сығыштары бирелгән. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙҙәренең эш тәжрибәләре тураһында һөйләйҙәр.

Орлоҡсолоҡ звеноһының етәксеһе иптәш Ғәниева түбәндәгеләрҙе яҙа:

«...Яҡшы эшкәртелгән ергә, ағыуланған, яровойлаштырылған орлоҡ менән, 17 гектар бойҙай сәстек. Звеноға беркетелгән участкалағы ужымды көл менән аҙыҡландырҙыҡ. Ҡар һыуҙары тоттоҡ. Хәҙер ужым ерен ҡул тырмалары менән тырматабыҙ... Звено члендәре арыштың һәр бер гектарынан 22 центнер урожай алыу һәм колхозды 1949 йылда яҡшы сортлы орлоҡ менән тәьмин итеү өсөн көрәшәләр».

Иптәш Ғөбәйҙуллин бригаданың эше тураһында былай тип яҙа:

«...Комсомолец-йәштәр трактор бригадаһы трактористары быйыл шартлы һәр бер тракторға 1500 гектар ер эшкәртергә йөкләмә алдылар. Хәҙер алған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн практик көрәш бара... Тракторист Зайнуллин һәм Миңнуллин Зиннур иптәштәр «НАТИ» тракторында норма буйынса 5,80 гектар урынына, үҙ сменаһында 11,5 гектар ер һөрәләр... Трактористар өсөн бөтә шарттар ҙа тыуҙырылды. Беҙҙең вагончик төрлө лозунгылар, плакаттар менән йыһазландырылған, унда шулай уҡ китаптар ҙа бар... Ашау-эсеү һәм һыу менән бригада үҙ ваҡытында тәьмин ителеп тора. Бригадала даими прицепщиктар беркетелде».

«Яңы тормош» колхозы тураһындағы был бит уңышлы ойошторолған. Социалистик ярыш алдынғыларының эш тәжрибәләрен пропагандалауҙы «Ҡыҙыл Баймаҡ» газетаһында ла шулай уҡ ойоштороп булыр ине. Бының өсөн редакцияның инициатива күрһәтеүе генә кәрәк.

Бесән сапҡыс машиналар

Үзбәкстанда, Төркмәнстанда, Тажикстанда, Азербайжанда, Ҡазаҡ ССР-ының көньяҡ райондарында бесән сабыу башланды.

СССР ауыл хужалығы Министерствоһының мал аҙығы һәм көтөүлек ерҙәр управлениеһе начальнигының урынбаҫары иптәш А. П. Моисеенко ТАСС хәбәрсеһенә былай тип белдерҙе:—ике-өс аҙнанан илебеҙҙә массовый рәүештә бесән сабыу һәм йыйнау эштәре башланасаҡ. Быйыл колхоздар бесән сабыуҙы ҡыҫҡа сроктарҙа — 10—15 көн эсендә үткәрергә тейештәр.

Илебеҙҙең күп кенә райондарында бесән йыйнауҙың байтаҡ өлөшө механизациялаштырыласаҡ. Ошо йылдың тик беренсе 4 айында ғына колхоздар, үткән йылда был өлкәһенә алған тиклем күләмдә тип әйтерлек, ат көсө менән эшләй торған бесән сапҡыстар һәм тырмалар алдылар.

Беҙҙең илебеҙҙә эшләнгән үҙе йөрөй торған беренсе бесән сапҡыстар колхоз болондарына сыҡтылар. Бындай бер машина көнөнә 40 гектарға тиклем бесән саба. Уның етештереүсәнлеге, ат көсө менән эшләй торған бесән сапҡысҡа ҡарағанда, 10—15 тапҡыр артыҡ.

Мәктәптәрҙә экзамендар һәм һынауҙар башланды

Өфө ҡалаһы 9-сы номерле башҡорт урта мәктәбенең 7 «А» класында экзамендарҙың беренсе сәғәте.

Һүрәттә (һулдан уңға): ассистенттар Ф. Хамматова, Ғ. Исхакова, балалар араһында класс етәксеһе М. Сәйфетдинова, Экзамен биреүселәрҙән (беренсе рәттә) Сыңтимер Әхмеров, Ринат Алтайский.

Г. Буравин фотоһы.

Беренсе көндә

Өҫтөлә айырыуса йәнлелек һиҙелә. Әйтерһең дә уның урамдарына төрлө-төрлө төҫтәге сәскәләр һибелгән. Өҫтәренә байрамса һәм таҙа аҡ, зәңгәр, йәшел, ҡыҙыл күлдәктәр кейгән шат балалар үҙҙәренең мәктәптәренә экзамендарға һәм һынауҙарға баралар. Был яуаплы эш уҡыусыларҙы ғына түгел, ата-әсәләрҙе лә тулҡынландыра. Улар шулай уҡ байрамса кейенгәндәр, эшкә барыу юлында балаларын, мәктәп ҡапҡаһына тиклем булһа ла, оҙата баралар. Экзамендәр һәм һынауҙар башланыуы башҡалабыҙҙа бөтә халыҡтың ысын байрамына әүерелде.

Экзамендарға һәм һынауҙарға ҡаланың мәктәптәре матур йыһазландырылған һәм йыйыштырылғандар. Улар уҡыу йылының был иң ҡатмарлы һәм яуаплы осорон уңышлы үткәреүгә саҡырған лозунгылар, плакаттар, бөйөк юлбашсыларҙың портреттары менән биҙәлгәндәр. Кластарҙағы комиссия өҫтәлдәре, коридорҙар төрлө-төрлө гөлдәр, баҫыу һәм сирень сәскәләренән яһалған букеттар менән тулы. Махсус бүлмәләрҙә буфеттар эшләй. Ҡыҫҡаса әйткәндә, экзамендәрҙе һәм һынауҙарҙы өлгөлө үткәреү өсөн уҡыусылар һәм уҡытыусыларға иң яҡшы, тыныс һәм уңайлы обстановка тыуҙырылған.

Ҡаланың өсөнсө номерле ҡыҙҙар мәктәбе экзамен һәм һынауҙар көнөн ҙур әҙерлек менән ҡаршыланы. Бинаның ҡайһы ғына мөйөшөнә ҡараһаң да был шатлыҡлы тантана һине үҙ ҡосағына ала. Унда бөтә кеше, бөтә нәмә байрамса.

Бына иртәнге 9 сәғәт булыуға бер нисә минут ҡала. Мәктәп алдары төрлө йәштәге уҡыусылар менән тулы. Улар тантаналы минуттар кисерәләр. Һәр класс янында уҡытыусы тора. Һәр бер бала үҙ урынында. Экзамендарға һәм һынауҙарға килмәй ҡалыусылар юҡ.

9 сәғәт. Ҡапыл звонок шалтырай. Минут етте. Бөтә кластар берәм-берәм экзамен һәм һынау бүлмәләренә инәләр. Бына 18-се ҡыҙҙар мәктәбенең 4-се «В» класы уҡыусылары үҙҙәренә билдәләнгән бүлмәгә урынлаштылар. Бында улар өсөн кәрәкле бөтә нәмә әҙер. Парта өҫтәре аҡ ҡағыҙ менән ябылған, алдан уҡ ҡара һауыттары, ручкалар, ҡағыҙҙар ҡуйылған.

4-се класс балалары һынау менән беренсе тапҡыр осрашалар. Йөҙҙәр шат. Ләкин уларҙың һәр ҡайһыһында әҫке тулҡынланыу һиҙелә. Улар «Ул поезды ҡотҡарҙы» тигән исемдә изложение яҙалар. Эш башланыу менән йөҙҙәр етдиләнде, ҡаштар тәләп бергә ҡушылдылар, иптән кенә иреңдәр ҡыймылдап ҡуя, ҡәләм аҡрын ғына яҙа башлай.

Класта тәрән тынлыҡ. Көсөркәнешле эш дауам итә.

Бер сәғәт үткәс тә уҡытыусы Е. Перескокова ҡулына беренсе изложение тапшырыла. Уны Лев Радченко яҙҙы. Изложение бик оҫта һәм тулы яҙылған. Унын артынан уҡ башҡа балалар ҙа берәм-берәм тапшырып, кластан сығып китә барҙылар. Был изложениела бер тимер юл станцияһы ҡарауылсыһы ҡыҙы Аннаның ниәсек пассажир поезын һәләкәттән һаҡлап алып ҡалыуы тураһында һөйләнә. Шуныһы шатлыҡлы, балаларҙың бик күбеһе изложениене тулы итеп, үҙ һүҙҙәре менән байытып яҙғандар. Уларҙың һәр ҡайһыһы уның аҙағына үҙенсә йомғаҡ яһап ҡуя белгән. Мәҫәлән, Әхтәм Теләпов: «Ул йөҙләгән кешеләрҙең тормошон һаҡлап алып ҡалды, уның батырлығы пассажирҙар йөрәгендә һаҡланасаҡ»,тигән. Ә Ғаяз Мусин «Анна кеүек балалар Советтар Союзында бик күп» — тип тамамлай үҙенең изложениеһен. Вениамин Вострецов «Анна үҙенең бурысын Тыуған ил алдында намыҫ менән үтәне» ти.

Эйе, бына был изложениене яҙыусы йәш граждандар ҙа үҙҙәренең бурыстарын Тыуған илебеҙ алдында намыҫ менән үтәү өсөн көрәшәләр. Уларҙың күбеһе экзамен эшен отлично һәм яҡшы билдәләренә яҙҙы.

М. Сакаева.

Көтөлгән көн

Өфө ҡалаһы Чернышевский урамының үрге осонда урынлашҡан, электр да шау-шыу менән тулы булған ике ҡатлы ҙур йортта бөгөн хәрәкәт бигерәк тә көслө. Әле ваҡыт бик иртә булһа ла йорт эсе һәм ишек алды, байрамса кейенгән, йөҙҙәренә борсолоу ҡатыш шатлыҡ билдәләре сыҡҡан балалар менән тулы. Был—15-се номерле татар урта мәктәбе. Бында бөгөн республиканың 287 уҡыусыһы мәктәптең киләһе баҫҡысына күтәрелеү, ә күптәре тормошҡа путёвка алыу өсөн һынауҙар бирә башлай. Һәр кем йөҙөндә етдилек, яуаплылыҡ күренә.

Бына бәләкәйҙәрҙәр төркөмө. Улар бындай яуаплы эш менән беренсе тапҡыр осрашалар, ошо һынауҙарҙың башланыуын, айырыуса тулҡынланып, түҙемһеҙлек менән көтәләр.

Уҡыусыларҙың күптәнге таныш—звонок сәғәт 9 еткәнен хәбәр итте.

Бында 4-се, 5-се кластарҙа рус теленән, ике 7-се класта алгебра менән арифметиканан, 9-сы класта туған телдән яҙма эштәр, ә 10-сы класта өлгөргәнлек аттестатына рус теленән сочинение яҙыу үткәрелде.

И. Фәрит.

Экзаменацион комиссиялар

Башҡортостанда урта мәктәптәрҙең 10-сы кластарын тамамлаусыларҙан өлгөргәнлек аттестатына экзамендар ҡабул итеү өсөн 112 экзаменацион комиссия ойошторолдо.

Был комиссиялар составына юғары белемле һәм тәжрибәле уҡытыусылар инде.

Республиканың мәғариф Министерствоһы, ауыл ерҙәрендәге мәктәптәрҙә экзамендарҙы тейешле кимәлдә үткәреү маҡсатында, башҡаланың педагогтарынан 70 кешене райондарға ебәрҙе.

Ҡыҙҙар мәктәбендә

Өфө ҡалаһы 1-се номерле ҡыҙҙар урта мәктәбе һынауҙар һәм экзамендар башланыу көнөнә ҙур әҙерлектәр менән килде. Мәктәптең бөтә эшмәкәрлеге ошо мөһим осорҙо яҡшы күрһәткестәр менән үткәреүгә йүнәлтелгәйне. Һынауҙар башланыу ваҡытына бөтә кәрәк нәмәләр әҙер, барлыҡ уҡыусылар ҙа үҙ урындарында булды. Экзамендарҙың тәүге көнөндә бөтә кластарҙа ла тип әйтерлек яҙма эштәр үткәрелде. Күп уҡыусыларҙың эштәре, тулы һәм таҙа булып, юғары баһа алдылар.

Театр

„Бөйөк мөхәббәт"

Армия командующие генерал-лейтенант Рябинин фронттың бер өлөшөндә ҙур һөжүм планы әҙерләй. План дошманға һиҙҙермәйенсә тормошҡа ашырылырға тейеш. Шуның өсөн ул, дошманды алдау маҡсаты менән, өлкән лейтенант Горбунов етәкселегендә Барсуки ауылына бер батальон ебәрә. Шарт бик ауыр: ҡойоп ямғыр яуа, һаҙлыҡ, етмәһә, һыу аша сығырға кәрәк... Совет һалдаты өсөн ала алмай торған крепость юҡ: Горбунов батальоны дошман тылына һиҙҙермәй сығып, ауылды ала. Ләкин батальон үҙе частән өҙөлә, ярҙам юҡ. Рябинин үҙенең уйлаған ҙур планында ныҡ тора, полк һәм дивизия командирҙарының сыҙамауына ҡарамаҫтан, Горбуновты ҡотҡарыуға көс ташламай. Батальон һәләк буласаҡ... Айырым командирҙар Рябининдең уйын аңламайҙар. Г. Березкоьның «Бөйөк мөхәббәт» пьесаһында драматик конфликттың төп һыҙығы ошолай.

Башҡорт Академия театры 15—16 майҙа «Бөйөк мөхәббәт» пьесаһын күрһәтте. Әҫәрҙе сәхнәгә Мәскәү Государство театр институтының дипломанты Шәүрә Мортазина ҡуйҙы.

Был спектакль — йәш режиссер өсөн һынау спектакле ине. Шулай уҡ ул коллектив өсөн дә ҙур һынау булды. Тураһын әйтергә кәрәк, режиссер ҙа, коллектив та һынауҙы иңгәҙә яҡшы тоталар. Былтыр сезон асылғанда ҡуйылған «Батырҙар» кеүек уҡ, «Бөйөк мөхәббәт» тә — ҙур, күп йыл кө... сөркәнеше талап иткән әҫәр. Коллектива намыҫ менән эшләгән, күп көс түккән. Намыҫлы хеҙмәт үҙ емешен бирә; ышандыра, ҡараусыларҙы тәрән тулҡынландыра торған спектакль әҙерләгәндәр. Бөтә спектакль буйына һуғыш атмосфераһы тойола, образдарҙың яныуы менән тоҡанаһың.

Совет кешеләре, уларҙың Ватанға булған сикһеҙ мөхәббәте, тиңһеҙ геройизмы ята әҫәрҙең нигеҙендә.

«Бөйөк мөхәббәт» пьесаһында төп образдар РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы А. Мөбәрәков (Рябинин), БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Р. Сыртланов (Горбунов) башҡарған ролдәр. Дөрөҫ, әҫәрҙең сюжет һөрөлөшө уларҙың эшмәкәрлеге, характерҙары менән ныҡ бәйле. Ләкин әҫәр, тотош алғанда, шулай уҡ асыҡ һыҙатланған, нескә үҙенсәлекле итеп бирелгән ябай кешеләрҙең хәрәкәттәренән тора. Шулай булғас, әҫәрҙе сәхнәгә ҡуйыусының бурысы ыгтибарҙы ике кешегә генә юғалтмай, тулы ансамбль булдырыу ине. Һәм режиссер быға ирешкән дә: сестра Маша (РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы З. Бикбулатова), ефрейтор Двоеглазов (БАССР-ҙың атҡаҙанған артисы Ғ. Туҡаев), ҡарт һалдат Никитин (З. Иғдәүләтов), Максимова (М. Вахитова), Румянцев (С. Сәнтов), Стеһан (Р. Саубанова) образдары ла йәнле тойғо уяталар, спектаклде тулыландыралар.

Арыҫлан Мөбәрәков—бик үҙенсәлекле талантҡа эйә булған, киң диапазонлы актер. Беҙ уны күп пьесаларҙа бер береһенә ҡапма-ҡаршы образдарҙы уйнауы буйынса беләбеҙ. Ләкин уның әле йәштәге Рябинин кеүек ролдәрҙә сыҡҡаны юҡ ине әле. Рябинин — ҡаты тәбиғәтле, үҙенә ныҡ ышанған, ҡараштарын алмаштырмай торған кеше. Бындай ҡатмарлы, әҫке кисерештәргә ҡоролған образды башҡарыу еңел хеҙмәт түгел. А. Мөбәрәков тимер ихтыярлы, бер ҡаршылыҡ алдында ла туҡтап ҡалмай торған Рябининде ысындан да тере итеп күҙ алдына баҫтыра белде.

Рим Сыртлановты-Горбуновты сәхнәлә беренсе күренеүе менән үк ҡараусылар яратырға өлгөрәләр. Ул — йәш, ғәйрәтле кеше. Маша менән мөхәббәтендә ҡыйыуһыҙ, балаһа булһа ла, һуғышта һыналған, ялҡынлы офицер. Сыртлановҡа булған яратыу бөтә спектакль буйына һыуынмай. Тик Р. Сыртланов беренсе картинала, Рябининдең адъютанты — үҙенең балалыҡ дуҫы менән осрашҡанда шатланыу тойғоларын бирә белмәне кеүек. яңалмалыҡ күрһәтте.

З. Бикбулатова, Ғ. Туҡаев, З. Иғдәүләтов, Л. Әхтәмова, Ғ. Яҡупов, Ф. Камалетдинова, С. Ҡунаҡбаев, М. Хәбибуллин иптәштәр ҙә үҙ уйындары менән хаҡлы яратыу ҡаҙандылар.

Талантлы артистка М. Вахитова өлкән сестра Максимова ролен башҡарҙы. Был образ пьесаның үҙендә тамамланып етмәгән. Максимова һуғыш шарттарында бер аҙ тупаҫлана төшкән. Горбуновҡа ҡарата йәшерен мөхәббәт һаҡлаған ҡыҙ кеүек... М. Вахитова образды шул планда алып бара ла. Ләкин ролдең тамамланмағанлығы, әҫәрҙә тулыландырыуға бер ниндәй ҙә әһәмиәте булмағас, талантлы артистка ла уға артыҡ нәмә өҫтәй алмаған.

Профессор Юрьев, баш врач Евлахов тар, энтаре буйынса ҙур урын тотһалар ҙа, әҫәрҙә бик бәләкәй күрһәтелгәндәр. Шуға күрә уларҙы башҡарыусыларҙан әллә ниҙәр талап итеүҙә лә ҡыйын. Ләкин актер өсөн кескенә роль юҡ, тигән бер ҡағиҙә бар. Ошо талаптан сыҡҡанда, БАССР халыҡ артисы Ғ. Карамышев та, атҡаҙанған артист Х. Мансуров та был образдарға үҙҙәренән күберәк нәмә һала алалар ине. Улар быны эшләмәнеләр, Юрьев менән Евлаховтарҙың хәрби врачтар түгел ине. Улар көсөркәнешле хәлдә һыҙатлай төшеүгә ярҙам итмәнеләр, шул атмосфера менән аҙ йәшәнеләр.

Р. Саубанова ауыл малайы Степан ролендә матур. Тик уға артыҡ сәбәләнеүҙәрҙе йомшарта төшөү кәрәк ине.

Шулай уҡ, бөтә артистарға лә ҡарата уларҙың хәрби кешеләр була белмәүҙәрен әйтергә кәрәк. Был белмәгәнлек званиелар ҙурая барған һайын ҙурая.

Оформление (худ. Ғ. Имашева), кейемдәр бик ярлы. Бөтә батальон һалдаттарына бер каска, рюкзак урынына — бөрөп бәйләнгән ауыл тоҡтары булыуын бер нәмә менән дә аҡлап булмай. Тимәк, армияны театр дирекцияһы — интендант насар тәьмин иткән. Был күренеш ысын барлыҡты боҙоп күрһәтеү!

Пьесаның үҙ етешһеҙлектәре лә аҙ түгел. Рябининдең ҡотолоуға мөмкинлек бар өҫтөнә, үлемгә барыуы бик бәхәсле. Шулай уҡ беренсе шаршауҙың өсөнсө, икенсе шаршауҙың икенсе картиналары драматургик яҡтан йомшаҡ эшләнгәндәр. Был картиналар тураһында режиссерға уйлай төшәһе урындар ҡалған әле.

Шундай айырым етешһеҙлектәргә ҡарамаҫтан, әҫәрҙең идеяһы дөрөҫ асылған, спектакль һаман үҫә барасаҡ. Быны икенсе көнгө спектакль уҡ асыҡ раҫланы. «Бөйөк мөхәббәт» — ҡараусыларҙы рухландыра, уларҙа совет кешеләренә хас юғары тойғолар тәрбиәләй торған спектакль.

Баязит Бикбай.

Башҡортостанда балет искусствоһы

«Серле флейта» балетен ҡуйырға әҙерлек бара. Спектаклдә Ленинград Хореография мәктәбенең башҡорт бүлеген тамамлаусылар — профессор Александр Викторович Ширяев уҡыусылары ҡатнашалар. Киҫкә премьера. Тик был һынау спектакле булманы: тап ошо көн иртәһендә, 1941 йылдың 22 июнендә, фашист илбаҫарҙар Ленин ҡалаһына беренсе бомбалар ташланылар...

Беренсе спектакль өҙелдә, ә йәш артистәр дошманға ҙур нәфрәт менән, Өфөгә ҡайтып, ҡайнар эшкә тотондолар. Алты йыл уҡыу, Ленинградтың Киров исемендәге Академик опера һәм балет театрында ҙур ижад сынығыуы алған һәм Мәскәүҙә үткәрелгән Ленинград искусство декадаһында бейеүҙәре менән улар үҙҙәрен танытҡандар ине инде. Шуға күрә беренсе спектакль уҡ Делибтен «Коппелия» балете ҙур күтәренкелек менән үтт. Тамашасылар Зәйтүнә Насретдинова, Тамара Ходайбердина, Рәнсә Дербышева, Халәф Сафиуллин, Фәүзи Саттаровтарҙың башҡарыуҙарын сикһеҙ яратыу менән ҡаршы алдылар. Был спектакль — беренсе һынау ҙа, Башҡортостанда балет театрын нигеҙләү ҙә ине.

Икенсе спектакль, композитор Исмәғилов һәм Степановтың «Сыңрау торна» балете, республиканың 25 йыллығына ҡарата ҡуйылды. Ошо гүзәл балеттән һуң коллектив ҡыйыу аҙымдар менән ҙур балет спектаклдәренә күсә башлай. П. И. Чайковскийҙен «Аҡҡош күле», Б. В. Асафьевтен «Баҡса һарай фонтаны» балеттәре йәш театрҙы киң юлға сығарҙы.

Хәҙер опера һәм балет театрының кадрҙары, ныҡ быуынға ултырыу менән бергә, пластик искусствоның юғары художество оҫталығына ла эйә булдылар. Башҡортостан хөкүмәтенен З. Насретдинова, Х. Сафиуллин иптәштәргә республиканың атҡаҙанған артистәре исемен биреүе—балет театры коллективе өсөн дә ҡыуаныслы, йәш театрҙың өлгәргәнлеген билдәләй торған хәл.

Зәйтүнә Насретдинова тыныҡ гүзәл биҙәкле, юғары техникаға эйә булған һәм әҫке тәрән йылылыҡҡа бай балерина. Ул бер-береһенә ҡапма-ҡаршы характерҙағы образдарҙы тыуҙыра белеүе менән үҙен танытты, ҡараусыларҙың ысын яратыуын ҡаҙанды. Шулай уҡ бай ижад мөмкинлектәренә эйә булған Гүзәл Сөләймәнова, Тамара Ходайбердина, Нәфилә Вәлитова кеүек балериналар ҙа халыҡ ҡаршыһында күренекле мөхәббәт менән файҙаланалар. Улар һәм солистарҙан Сафиуллин, Саттаров, Йосопов иптәштәр үҙ искусстволарында хәҙер өлгәргән мастерҙар инде.

Башҡортостанда балет искусствоһы йылдан-йыл үҫә, сыныға бара. Ошо көндә лә Ленинград Хореография мәктәбендә күп һанда өҫтәлмә кадрҙар әҙерләнәләр. Театр яңы балет спектаклдәренән Минкустың «Дон Кихот», Глиэрҙен «Ҡыҙыл мәк» балеттәре өҫтөндә эшләй.

Балет кадрҙарыбыҙ классик спектаклдәрҙә һыналдылар. Ләкин театрҙы тағы ла үҫтереү, халыҡтың ысын байлығына әйләндереүҙә Башҡортостан композиторҙары әле булһа яҡындан ярҙамға килгәндәре юҡ. Театр бөгөнгө темаға һәм башҡорт совет темаһына яҙылған репертуарҙарға ныҡ һыуһай.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенен музыка тураһындағы тарихи ҡарары һәм композиторҙарҙың беренсе Бөтә Союз съезында ҡуйылған талаптар беҙҙең композиторҙарыбыҙҙың ижадында ла балет искусствоһына ҡарата ҙурҡа боролош яһауҙы билдәләй. Шулай уҡ Башҡортостан искусство эштәре Управлениеһе һәм театрҙың үҙ етәкселәренә балет репертуары тыуҙырыу тураһында сериоз эшкә тотонорға ваҡыт.

Г. Рамазанов, Ш. Биҡҡолов.

Шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн матч-турнирҙең ябылыуы

18 майҙа шахмат буйынса донъя беренселеге өсөн булған матч-турнир ябылды. Союздар Йортоноң Колонналар залында ярыштың йомғаҡтарына арналған ултырыш үткәрелде. Президиумда — чемпионатта ҡатнашыусылар, халыҡ-ара шахмат федерацияһының һәм төрлө илдәрҙең шахмат ойошмаларының вәкилдәре.

Кисәне турнирҙе ойоштороу комитетенен председателе, СССР Министрҙар Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт эштәре комитете председателенең урынбаҫары Д. В. Постников асты.

— Бөтә илдәрҙең миллионлаған халыҡтары, — тине Постников үҙенең инеш һүҙендә, — шахмат таҡтаһы өҫтөндә барған көрәште түҙемһеҙлек менән күҙәттеләр. Турнир, совет кешеләренең тырышлығын һәм һәләтлеген демонстрациялаған, совет шахматистәренең тантанаһы менән тамамланды. Гроссмейстер Ботвинниктең гүзәл еңеүе — бөтәһенән элек, совет шахмат искусствоһының еңеүе. Уның үҫеүенә Совет Хөкүмәте һәм большевиктар партияһы бөтә кәрәкле шарттарҙы тыуҙырҙылар.

ФИДЭ — халыҡ-ара шахмат федерацияһының президенте доктор А. Рюб үҙенең телмәрендә түбәндәгеләрҙе әйтте:

— Был, кисә шахмат искусствоһының тарихендә ысын мәғәнәһе менән тантаналы эш. Бөгөндән алып шахмат донъяһы атаҡлы совет шахматисе Михаил Ботвинниктен өҫтөнлөгөн таный.

Унан һуң доктор Рюб донъя беренселеге өсөн булған шахмат турнирында М. М. Ботвинниктең еңеп сығыуын һәм ФИДЭ уставына тулыһынса ярашлы рәүештә СССР-ҙың гроссмейстере Ботвинникҡа шахмат буйынса донъя чемпионы исеме биреү документен иғлан итте. Советтар Союзының государство Гимне уйналған ваҡытта ФИДЭ президенте донъяның яңы чемпионына лавра веногын кейҙерҙе.

Бөтә Союз шахмат секцияһының председателе иптәш Виноградов ҡайнар тәбрикләү телмәре һөйләне. Бөтә залдың алҡыштары аҫтында ул былай тине:

— Был яуаплы турнирҙа беҙҙең совет шахмат ижады, атаҡлы мастерҙар тәрбиәләгән совет шахмат мәктәбе еңде. Шахмат буйынса донъя беренселеге байрағы гроссмейстер Ботвинниктең ышаныслы ҡулына күсте. Беҙ, был байраҡты совет ерендә мәңгелеккә ҡалдырыу өсөн көрәшәсәкбеҙ.

Шулай уҡ Голландия, Швеция, Венгрия, Болгария, Чехословакия, Югославия һәм Польшаның шахмат федерацияларының һәм союздарының вәкилдәре Г. Зиттерстейн, И. Лоума, Ф. Рогард, Т. Флориан, Ю. Тошев, К. Опоченский, С. Войнарович, М. Райкович, сит илдәр менән культуралы элемтә алып барыуҙың Бөтә Союз обществоһының правление председателе В. С. Кемелев ҡотлау телмәрҙәре менән сығыш яһанылар. Шулай уҡ шахмат буйынса донъяның элекке чемпионы доктор Макс Эйве рус телендә сығыш яһаны.

Тәбриктәргә яуап һүҙе менән шахмат буйынса донъя чемпионы СССР-ҙың гроссмейстере М. М. Ботвинник сығыш яһаны. Ул матч-турнирҙе ойоштороусыларға һәм унда ҡатнашыусыларға ҡайнар рәхмәт белдерҙе. (ТАСС)

Емеш-еләк ағастары тейәлгән баржалар

Хеҙмәтсәндәрҙең емеш-еләк ағастарын ултыртыуға булған интерестәре йылдан-йыл арта бара. Республикабыҙҙа «Урман аҙнаһының» үткәрелеүе унайы менән емеш ағастарын массовый рәүештә ултыртыу башланды. Тик һуңғы бер нисә көн эсендә генә Кушнаренколағы государство питомнигы тарафынан 20 мең төптән артыҡ алма ағасы һатылды.

Ултыртыу материалдары алыу өсөн төрлө райондарҙан — Дүртөйлө, Саҡмағош, Туймазы, Борай райондарынан, предприятиеларҙан автомашиналар, ылауҙар өҙлөкһеҙ килеп тора.

Кушнаренко госпитомнигы емеш-еләк ағастары тейәлгән бер баржаны Бөрө районына оҙатты һәм бер баржа Өфөгә килде. Өфө һәм Черниковск өсөн ултыртыу материалдары тейәлгән тағы ла бер баржа килеүе көтелә.

Беҙҙәге государство питомниктарында һәм күп кенә колхоз питомниктарында ла эш шулай йәнле рәүештә бара. Республиканың колхоздары 250 гектар майҙанда емеш ағастары, 400 гектар майҙанда еләк ҡыуаҡлыҡтары ултыртырға тейештәр.

М. Суслов.

Уоллес әфәндене Асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндең яуап хаты тураһында

АҠШ

НЬЮ-ЙОРК, 18 май. (ТАСС). «Нью-Йорк таймс», «Нью-Йорк геральд трибюн» һәм «Дейли Уоркер» газеталарының иртән сыҡҡан номерҙәре Уоллес әфәндене Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабын үҙ биттәренең күренекле урынында баҫып сығарҙылар. «Нью-Йорк таймс» газетаһы үҙенең Лондондағы хәбәрсеһенең белдереүен беренсе биткә урынлаштырҙы. Был белдереүҙә И. В. Сталиндең яуабының тексы килтерелә. Газета был хәбәргә түбәндәге баш менән баҫып сығарҙы: «Сталин, Уоллестең хаты һөйләшеүҙәр өсөн нигеҙ булып тора, тип белдерә. Россия, ике системаның бергә йәшәүе һәм тыныс үҫеше мөмкин, тип яуап бирә. [illegible]».

Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Вашингтондан хәбәр итеүенә ҡарағанда, государство секретарының махсус ярҙамсыһы Макдермотт, И. В. Сталиндең яуабына комментарийҙар биреүҙән [illegible] бирмәйәсәк, тип белдергән.

Ассошиэйтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Вашингтондан белдереүенә ҡарағанда, сит ил эштәре буйынса сенат комиссияһының күренекле члены Коннели (демократтар партияһы члены, Техас штаты) И. В. Сталиндең яуабына комментарийҙар биреп, былай тип белдергән: «Әгәр ҙә премьер Сталиндең тәҡдиме, посол Смит [illegible] Ҡушма Штаттар [illegible] тарыбыҙҙы тыныс юл менән регулировать итеү өсөн һөйләшеүҙәр башлауға шатланасаҡтар, тип иҫәпләйем».

Башҡаса комментарийҙар булманы әле.

Информацион агентстволар, Вашингтондың официаль круттарында И. В. Сталиндең яуабы хәҙерге ваҡытта һаҡлыҡ менән ҡаршылана һәм ул турала «бер нәмә лә әйтелмәй», тип хәбәр итәләр.

Юнайтед Пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһенең фекеренә ҡарағанда, И. В. Сталиндең яуабы Ҡушма Штаттарҙағы официаль круттарҙың позицияһын үҙгәртмәгән. Был позиция шунан тора: Ҡушма Штаттар Европала көстәр тигеҙлеге аяҡҡа баҫтырылғанға һәм был тигеҙлек Көнбайыш өсөн уңайлы булғанға тиклем Советтар Союзы менән ниндәй ҙә булһа тыныслыҡ тураһында һөйләшеүҙәрҙә булдырмаҫҡа тейештәр.

Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең белдереүенә ҡарағанда, Американың официаль кешеләре Уоллестең Асыҡ хатта яҙылған программаһын элек башҡа илдәрҙә күп тапҡырҙар иғлан ителгән дөйөм идеалдарҙың ҡабатланыуы ғына тип характерлайҙар.

Ассошиэйтед Пресс агентствоның хәбәрсеһе Вашингтондан, В. И. Сталиндең яуабы айҡанлы, Вашингтондағы атмосфера [illegible] тип хәбәр итә.

НЬЮ-ЙОРК, 19 май. (ТАСС). «Нью-Йорк геральд трибюн» газетаһының Вашингтондағы хәбәрсеһе хәбәр итеүенә ҡарағанда, АҠШ-тың «авторитетле круттарында», «Америка хөкүмәтенә Уоллес программаһын һөйләшеүҙәр өсөн нигеҙ сифатында файҙаланыу теләге һис тә юҡ», тип иҫәпләйҙәр.

«Юнайтед стейтс ньюс» журналының нәүбәттәге номерында [illegible] Лоуренс [illegible] Смит [illegible] ошо мәсьәлә буйынса элек үк килешеүгә өлгәшелгән булырға тейеш ине. Был ваҡиғала былай килешеү булманы».

Лоуренс, Американың ҡайһы бер официаль кешеләре «кризис атмосфераһына шул тиклем ныҡ күнделәр, күрәһең, обстановка бер ни тиклем үҙгәргәндә һәм тыныслыҡҡа аҙым яһағанда үҙҙәрен бынан бер ни тиклем күңелләре ҡайтҡан итеп һиҙәләр», тип уҫал көләү менән белдерә. Лоуренс, Вашингтондың позицияһын иң яҡшы ваҡиғала, АҠШ үҙен һөйләшеүҙәргә артыҡ ныҡ мохтаж итеп күрһәтергә теләмәй һәм конкрет совет тәҡдимдәренә өлгәшергә теләй, тип әйткәндә лә, «былай аңлашыу ҙа рустарҙы түгел, ә беҙҙе, үҙенең һүҙҙәрендә тороуҙан ҡурҡыусы хөкүмәттең тура юлынан ситкә тайпылыуы» тип күрһәтеүен аңлатырға мөмкин, тип билдәләй.

Һөҙөмтәләү һүҙе итеп Лоуренс, уҙған аҙнала АҠШ, үҙенең һүҙҙәренән баш тартып, хата эшләне, тип белдерҙе. «Беҙ хатабыҙҙы шундам төҙәтергә тейешбеҙ... Бөтә донъя, тыныс һөйләшеүҙәр өсөн ишектәрҙең асыҡ ҡалыуын теләй һәм Американың государство деятелләре, был ишектәрҙең ҡасан да булһа яңынан ябылмауына юл ҡуймаҫҡа тейештәр».

Уоллестең радио аша яһаған сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 18 май. (ТАСС). Юнайтед-Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Сан-Францисконан хәбәр итеүенә ҡарағанда, өсөнсө партиянан АҠШ президентлегенә кандидат Уоллес, үҙенең Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабы матбуғатта баҫылған хәбәрҙәр менән танышҡандан һуң, радио аша яһаған сығышында, Сталиндең белдереүе Уоллесҡа генә адресланмаған, бәлки «ул Ҡушма Штаттар халыҡтарына Россия премьеренең тыныслыҡ тәҡдим итеүсе мөрәжәғәте булып тора», тип белдергән. «Был — беҙҙең фекер айырымлыҡтарыбыҙҙы тикшереү «һыуыҡ һуғышты» туҡтатыу өсөн юлдар һәм средстволар табыу тураһында Россия тарафынан яһалған реаль һәм билдәле тәҡдим. Ошо кризисте хәл итеүҙә үҙемдең ҡорал булып тороуыма һәм беҙҙең фекер айырымлыҡтарыбыҙҙы регулировать итеү тураһындағы ошо тәҡдимгә ярҙам итә алыуыма мин шатмын. Минең үҙемә килгәндә, миндә был донъяла ҡыҙыҡһына торған бер генә нәмә — бөтә донъяла тыныслыҡҡа өлгәшеү өсөн минең көсөмдән килгән бөтә нәмәне эшләү теләге генә йәшәй».

Уоллес, СССР менән АҠШ араһында күптән түгел дипломатик фекер алышыуҙарҙан һуң Сталиндең белдереүе «Ҡушма Штаттар һәм Россия араһында реаль һөйләшеүҙәрҙең» башланғысы булып тора, тип айырыуса билдәләне. Шунан ары Уоллес былай тип белдерҙе: «Әгәр ҙә мин бөтә донъяла тыныслыҡ урынлаштырыу эшенә ярҙам итерлек нәмә лә булһа эшләй алһам, минең кампанияма ҙур уңыш менән тамамланды, тип иҫәпләр инем».

Ассошиэйтед Пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Уоллес, минең Асыҡ хатыма Сталиндең биргән яуабы миңе гәжәпкә ҡалдырҙы, һәм, ихтимал, хәҙер дипломатик донъя минең Асыҡ хатым менән танышыр, тип белдергән.

Еврей государствоһының ваҡытлы президентен һайлау

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Тель-Авивтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Израиль государствоһының 37 членҙан торған һәм парламент функцияларын үтәүсе ваҡытлы совете (органы) үҙенең беренсе ултырышында доктор Вейцманды еврей государствоһының ваҡытлы президенте итеп һайлаған.

АҠШ-тың Мәскәүҙәге посольствоһы сотрудникгенең Мәскәү ҡала Советы председателенә яҙған хаты

АҠШ-тың Мәскәүҙәге посольствоһы Хәрби атташеһенең сотрудниге Америка армияһының сержанты Джеймс М. Мак-Миллин ошо көндәрҙә хеҙмәтсәндәр депутаттарының Мәскәү Ҡала Советы председателенә түбәндәге йөкмәткеле хат менән мөрәжәғәт итте:

«Мәскәү Ҡалаһы Мэренә.

Ҡушма Штаттар армияһының сержанты, Американың Мәскәүҙәге посольствоһының хәрби атташеһенен шифровальщигенән.

Мин үҙем тыуған, тәрбиәләнгән һәм белем алған Ҡушма Штаттарҙан бынан ике йыл элек Советтәр Союзына килдем. Хәҙер Америкала конгрессмендарҙың, сенаторҙарҙың һәм делегатарҙың шәхси байлыҡ һәм власть өсөн әҙләкһеҙ көрәштәрендә ҡорал булып тороусы политиканан миң алыҫ инем.

Ҡушма Штаттарҙа йәшәгән ваҡытымда мин Советтәр Союзындағы кеүек, ябай кеше тураһында хәстәрлек күреүсе һәм халыҡтың хәҙерге тормош һәм культура шарттарын даими рәүештә яҡшыртыуға йүнәлтелгән хөкүмәт системаһы барлығын күҙ алдыма ла килтермәй инем. Ябай халыҡ байлығы менән ҡайһы бер төркөм кешеләрҙең байыуҙарына минең асыуым ҡабара ине.

Бары тик СССР-ға килгәс кенә, мин Американың хәҙерге хөкүмәтенен боҙоҡлоҡтары гәйеллекһеҙ политик системаның ҡоро[...] икәнлегенә төшөндөм, ул систе[...] ла кеше бары тик башҡа[...] ҡыҫыу юлы менән генә үҙе[...] шы көн-күреш төҙә ала.

Ер, тәбиғәт байлыҡтары [...] промышленность ҙур булмаған [...] төркөм байҙар ҡулында б[...] политик система ғәйәт ҙур [...] һеҙлек икәнлеге миңә хәҙер [...]

Совет халҡын, уның торм[...] һәм фекер йөрөтөүҙәрен күр[...] мин киләсәктең был ил ҡулы[...] буласағына төшөндөм, унда к[...] тура, техника һәм фән ҡаҙа[...] тары бөтә халыҡҡа хеҙмәт итә.

Бөтә нәмә халыҡтыҡы б[...] был политик системаның капи[...] листарға һәләкәт ҡурҡыныс т[...] ҙырғанлығын капиталистар, к[...] һеҙ, күптән төшөнгәнләрҙер. А[...] рика капиталистәре тарафынан [...] вет иленә асыулы һөжүмдәр я[...] дыуын бары тик шуның менән г[...] аңлатырға мөмкин.

Хәҙерге ваҡытта Америка ме[...] идара иткән капиталистарҙан С[...] веттәр Союзына ҡаршы полит[...] һына протест билдәһендә м[...] АҠШ-ҡа ҡайтыуҙан баш тарт[...] һәм СССР-ҙа тороп ҡалам.

Шундай уҡ хатты мин АҠШ-тың Мәскәүҙәге посолы С[...] әфәндегә лә ебәрҙем.

Джеймс М. Мак-Миллин,
1948 йыл 15 май.

АҠШ государство департаментенең белдереүе

ВАШИНГТОН, 17 май. (ТАСС). Кисә кис Ҡушма Штаттарҙың государство департаменте махсус пресс-конференция саҡырҙы. Был конференцияла түбәндәге белдереү яһалды: «Американың Мәскәүҙәге посольствоһы, Америка армияһы сержанты Джеймс Мак-Миллин был ваҡытҡа үҙенең хеҙмәт сроты тамамланыуы тураһында приказға ярашлы рәүештә, 15 майҙа Ҡушма Штаттарға ҡайтыуҙан баш тартыуы һәм Советтәр Союзында ҡалырға уйлауы тураһында Американың Мәскәүҙәге посольствоһына белдереү ебәрҙе, тип хәбәр ит[...] Мак-Миллин һуңғы ике йыл [...] кыт эсендә Мәскәүҙәге посольст[...] эргәһендәге хәрби атташе штаты[...] ла эшләне. Ул отпуск алмайынса[...] 15 майҙан алып унда эшләмәй».

Юнайтед Пресс агентствоһын[...] хәбәр итеүенә ҡарағанда, гос[...] дарство департаменте ваҡи[...] имеш. Мак-Миллиндең хәрәкәт[...] ре политик фекерҙәрҙә таяныу[...] ләнмәгән, тип раҫларға маташа[...]

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Лондон радиоһы түбәндәгеләрҙе хәбәр итә: төнөн өс көн Тель-Авив бомбаға тотола. Бөгөн беренсе һөжүм ваҡытында ике самолет ҡатнашты, улар ярты дюжинаға яҡын бомба ташланылар. Улар портты бомбаға тоторға уйлағандар, күрәһең. Икенсе һөжүм бер нисә сәғәттән һуң булды.

Төньяҡтан, көнсығыштан һәм көньяҡтан Палестинаға инеүсе ғәрәп ғәскәрҙәре алға барыуҙарын дауам иттерәләр. Дамасктан, Палестинаның төньяғында Сирия һәм Ираҡ ғәскәрҙәре бергә ҡушылдылар, тип хәбәр итәләр.

Шулай уҡ, Египет ғәскәрҙәре Тель-Авивтан 40 милль алыҫлыҡта торалар, тип хәбәр итәләр.

БЕЙРУТ, 17 май. (ТАСС). Газеталарҙың һәм радиостанцияларҙың раҫлауҙарына ҡарағанда, Ливан армияһы Ливан-Палестина сигендәге Мелкие ауылын алған. Сирия армияһы Тивериад күленең көньяғына урынлашҡан Самах ауылын һәм тимер юл станцияһын алған. Ираҡ армияһы, шул уҡ хәбәрҙәргә ҡарағанда, Вейсан ҡалаһы менән Тивериад күле араһындағы Иордан йылғаһы буйына урынлашҡан Ротенберг электр станцияһын алған һәм станция менән бәнәшә ауылдар өсөн һуғыштар алып бара. Трансиордания армияһының бер өлөшө Афул юнәлешенә табан бара, икенсе өлөшө Лидда аэродромын алған. Трансиордания армияһының ҡайһы бер подразделениелары Иерусалимдең тирә-яғында торалар. Египет армияһы Газа ҡалаһын алып, Лидда юнәлешенә табан барыуын дауам иттергән һәм Трансиордания армияһы менән ҡушылған.

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Египет самолеттары Тель-Авив янындағы аэродромды атакаға тотҡандар һәм уны «туҙҙырып» [...] лыһынса яраҡһыҙ хәлгә килт[...] гәндәр. Египеттен һауа көстә[...] шулай уҡ Газа һәм Дершаб ауы[...] һында урынлашҡан еврей ауыл[...] атакалағандар.

Каирҙә, Египет ғәскәрҙәре[...] штаб-квартираһын урынлашты[...] өсөн Газа билдәләнде һәм ул[...] бағы һуғыш хәрәкәттәре өсө[...] әҙерлек саралары алып бары[...] тип официаль рәүештә иғлан ит[...] гән.

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Каирҙағы х[...] бәрсеһенен хәбәр итеүенә ҡара[...] ла, Египеттең милли оборона м[...] нистре ил өҫтөндә бөтә т[...] осоштарҙы тыйған һәм был пр[...] казға буйһонмаусы самолеттар[...] атыласаҡтар, тип белдергән.

Бөгөн, кисә кис Египет король[...] Египет армияһының штаб-квар[...] раһына барғанлығы билдәле бу[...] лды. Официаль булмаған хәбәрҙә[...] гә ҡарағанда, Египет ғәскәрҙә[...] еврейҙәр ҡулындағы Яффа ҡала[...] һынан көн тигәндә 72 километр[...] алыҫлыҡта торалар.

Официаль булмаған мәғлүмә[...] тәргә ҡарағанда, уҙған төндә Ег[...] иптең һауа көстәре Тель-Ави[...] портындағы тәрелештәрҙе си[...] гәндәр.

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Каирҙағы х[...] бәрсеһе, раҫланмаған мәғлүмәттәр[...] гә ҡарағанда, Египет ғәскәрҙә[...] Газалағы төп базанан 13 мил[...] алыҫлыҡтағы Эль-Маджалға б[...] рып еткәндәр, тип хәбәр итә.

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Александрия[...] нан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ег[...] властәре, ҡорал тейәлгән һәм [...] ланғанынса, Палестина еврейҙә[...] өсөн билдәләнгән Бельгия пароход[...] дын туҡтатҡандар. Кисә кис Ег[...] пет министре Хасан-паша пароход[...] тың «тотолоуы» тураһында бел[...] дергән.

Ҡушма Штаттар Гоминданға 26 карап бирҙеләр

НАНКИН, 18 май. (ТАСС). «Синьминьваньбао» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Ҡытай хәрби-диңгеҙ властәре вәкилд[...] Американың Ҡытайға бирелгә[...] карабын ҡабул итеү өсөн Ф[...] пиныға киткәндәр.

ТӨҘӘТЕҮ

Газетабыҙҙың 99-сы номерында баҫылып сыҡҡан: «Уоллес әфәндене Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабы»ның түбәндән икенсе абзацы аныҡ яҙылмаған. Был абзацты түбәндәгесә уҡырға:

Уоллес әфәндене программаһы менән килешергә лә йәки килешмәҫкә лә мөмкин. Ләкин, шуныһы шикһеҙ: тыныслыҡ һәм халыҡтарҙың хеҙмәттәшлеге тураһында хәстәрлек күреүсе бер генә государство деятеле лә был программаны ситләтеп үтә алмай, сөнки ул халыҡтарҙың тыныслыҡты нығытыуға булған ышаныстарын һәм ынтылыштарын сағылдыра һәм уны, һис шикһеҙ, күп миллионлаған «ябай кешеләр» тарафынан яҡлаясаҡ.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00753. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 101
22
май
шәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәйек! Яҙғы сәсеүҙә иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы кеүек эшләргә! (1-се бит).

Өфө ҡала Советы һәм ВКП(б)-ның ҡала комитетында мөрәжәғәте. (2-се бит).

Район гәзиттәре биттәренән. (2-се бит).

Экзамендар һәм һынауҙар ҙур күтәренкелек менән бара. Ғ. Әхмәтшин. — Тәүге экзамен шатлығы. (2-се бит).

Кирәй Мәргән. — Атаҡлы мастер. (2-се бит).

Беҙҙең республикала. (3-сө бит).

БӘЛӘКӘЙ ФЕЛЬЕТОН. Ғ. Бик. — Самолет ҡайтанан килмәне... (3-сө бит).

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә сит илдәрҙә откликтар. (3-сө бит).

Совет-Америка мөнәсәбәттәре турайында Иер-тинакс. (3-сө бит).

Палестиналағы ваҡиғалар. (3-сө бит).

Юғары тиҙлектә борауларға

Совет хөкүмәте нефтселәрҙең эшен юғары баһаланы. Бөйөк Сталиндең күрһәтмәһе, ҙур ярҙамы менән барлыҡҡа килтерелгән «Икенсе Баку» нефтселәре, шул иҫәптән Башҡортостан нефтселәре лә үҙҙәренең хеҙмәттәренә юғары баһа алдылар. Нефть сығарыуҙы, эшкәртеүҙе һәм тәҙләш эштәрен ойоштороусыларҙан, эксплоатационник һәм разведчиктарҙан ҙур төркөм работниктар хөкүмәттең юғары наградаларына лайыҡ булдылар.

Республика нефть промышленносын үҫтереүҙә бораулаусыларҙың хеҙмәте ҙур. Улар ике мең метрға яҡын тәрәнлектә ятҡан девон нефтенә ҡыйыу һөжүм иттеләр. Бик күп ҡаты ҡатламдар аша үтеп, уны таптылар. Бай нефть ятышы асылғас проходка тиҙлеге өсөн ярыш башланды һәм ул йылдан-йыл массовый төҫ ала бара: һөҙөмтәлә үткән йыл «Туймазынефть» тресы разведка бораулауы планын уңышлы үтәп, күп нефть бирә торған тиҫтәләрсә девон скважиналарын эксплоатацияға тапшырҙы. Ағымдағы йылдың дүрт айында, үткән йылдың ошо осоро менән сағыштырғанда, проходка тиҙлеге ике тапҡырға артты. Ишембайҙа ла темп күтәрелә бара. Бораулаусыларҙың батыр хеҙмәте ҡышҡы осор ҡыйынлыҡтарын да еңә барғанлығын күрһәтә.

Юғары тиҙлек өсөн көрәш яңы методтарҙы индереүгә, бораулау режимен камиллаштереүгә мөмкинлек бирҙе. Турбина юлы менән бораулау киң ҡолас ала бара. Ул роторға ҡарағанда үҙенең ҙур өҫтөнлеген күрһәтте. Үткән йыл Туймазыла турбина юлы менән бораулау роторға ҡарағанда проходка тиҙлеген ике тапҡырға арттырҙы. Был өҫтөн метод ағымдағы йылда Ишембайҙа ла, «Башнефтеразведка» трестында ла ҡулланыла башланды. Долотоларҙы үтәлә торған ҡатламдарҙың характерына ҡарап нагрузка биреү, насостарҙың етештереүсәнлеген, уға яраштырып, балсыҡ иҙелмәһен яҡшы әҙерләү, бәләкәй механизмды файҙаланыу проходка тиҙлеген арттырыуҙа шулай уҡ ҙур роль уйнаны.

Нефть промышленносын үҫтереүҙә бораулаусылар күп көс һалды. Ләкин алда тағы ла күберәк эш бар әле. Беҙ күп нефть бирә торған скважиналарҙы эксплоатацияға биреүҙе айҙан-айға арттырырға, яңы бай нефть ятыштарын асыуҙы тиҙләтергә тейешбеҙ. Ә был бурыстың төп шарты — бораулауҙы тиҙләтеү. Хөкүмәт наградалары алыу айҡанлы булып үткән митингыларҙа күп кенә мастерҙарҙан һәм бригадаларҙан станок-айға 1000 — 1200 метр тиҙлектә бораулауға йөкләмә алыуы шул турала һөйләй.

Алдынғыларҙың инициативаларын, яңы методтарҙы производствоға киң индереү берекмә, трест рәһбәрҙәренән практик ярҙамы, оператив етәкселеге менән нығытылырға тейеш. Хәҙер турбина юлы менән бораулау өсөн тейешле ҡеүәттәге электр моторҙары етешмәй. Шулай уҡ ремонт базаларының булмауы был яңы методты ҡулланыуҙа ныҡ ҡамасаулай. «Башнефтеразведка» тресы механизмдарҙы ремонтлау өсөн икенсе ҡалаға алып барырға мәжбүр була. Электр моторҙары урынына пар двигателдәре файҙаланыу турайында Туймазы бораулаусылары тарафынан башланған инициативаны аҙағына тиклем еткерергә, өс треста ла ремонт базалары булдырыуҙы яҡын ваҡыттар эсендә хәл итергә кәрәк.

Скважиналарҙы төҙөү эшен тиҙләтә торған күп саралар бар. Вышка аҫтына металл фундамент файҙаланыу, металл вышкаларҙы йыйғанда Киршенбаум агрегатын ҡулланыу скважиналарҙы тиҙ төҙөргә мөмкинлек бирә. Ләкин берекмә һәм трестарҙа был мөһим механизацияны индереүҙә һөйләнеүҙәрҙән уҙа алмайҙар әле. Күп бригадалар бәләкәй механизм — иң кәрәк булған Залкин асҡысы, долотоларҙы һүтеп алыу таҡтаһы һәм башҡалар менән тәьмин ителмәгән. Шуның арҡаһында инструменттәрҙе алмаштырыуға, торбаларҙы күтәреү-төшөрөү эштәренә күп ваҡыт әрәм була. Был сәрьез кәмселектәр һис кисекмәҫтән бөтөрөлөргә тейеш.

Билдәле булғанынса «Башнефтеразведка» тресы яңы нефть ятыштары асыуҙа байтаҡ эш күрһәтте. Ләкин ул бораулау планын йылдан-йылға үтәмәй килә әле. Ағымдағы йылдың үткән дүрт айында ла планның өстән бер өлөшө үтәлмәне. Станоктар, бораулау бригадалары күп ваҡыт буш торалар. Сәйки аварияларға юл ҡуйыла, вышкалар төҙөү-монтажлау эше оҙаҡҡа һуҙыла, балсыҡ иҙелмәһенең сифатына тейешле иғтибар бирелмәй. Трест етәкселәре, уның инженер-техник работниктары артта ҡалыуҙы бөтөрөү өсөн етди саралар күрергә тейештәр.

— Станок-айға 1000 метр! Хөкүмәт наградаларын алған алдынғы бораулау бригадалары ошондай йөкләмә алдылар. Ҙур һәм яуаплы йөкләмә. Ләкин турбина юлы менән бораулағанда реаль һәм үтәй алырлыҡ йөкләмә ул. Хөкүмәттең бөйөк наградаһы менән рухланған, ҡеүәтле техника менән ҡоралланған бораулаусылар һүҙендә торорҙар, республикабыҙ нефтселәренең алдынғы отряды булараҡ, уларҙың стахановсы вкладын индерерҙәр тип ышанырға мөмкин.

Ләкин ул үҙенән-үҙе килмәйәсәк. Юғары тиҙлек өсөн бораулау өсөн йөкләмәләрен барған ярыштың башында торорға, бөтә бораулаусыларҙы ла ярыш менән солғап алырға, улар алдарына ҡуйған маҡсаттарына өлгәшеүҙәре өсөн уларға һәр яҡлап ярҙам итергә, уңайлы эш һәм көн-күреш шарттары тыуҙырырға кәрәк. Быларҙы тәьмин итеү берекмә, трестар, контораларҙағы етәкселәренең дә, уларҙағы партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының да, шулай уҡ партияның Октябрьск, Ишембай, Стәрлетамаҡ горкомдарының да мөһим бурысы булып торорға тейеш.

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәйек!

Яҙғы сәсеүҙә иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы кеүек эшләргә!

Яҙғы эш планы үтәлде

Нәрмәкәй районының Приют МТС-ында трактор бригадаһы бригадиры иптәш Хөрмәт Ғөбәйҙуллин бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға хат яҙған саҡта быйыл 1.500-әр гектар ер эшкәртергә һәм бригада тарафынан хеҙмәтләндерелгән колхоздарҙа юғары урожай үҫтереүҙе тәьмин итергә йөкләмә алғайны.

Иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы үҙ һүҙендә ныҡ тора. Ул яҙғы баҫыу эштәрен МТС-та беренсе булып башланы. Трактористар көн һайын норманы арттырып үтәйҙәр. Зәйнуллин һәм Миңнуллин иптәштәр һәр көн 8 гектар урынына 17—18-әр гектар ер һөрәләр. Бригада көн һайын 70-әр гектар ашлыҡ сәсеп, норманы 165 процентҡа үтәй.

Хеҙмәт етештереүсәнлегенең юғары булыуы һөҙөмтәһендә иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы яҙғы эштәр планын срогынан алда үтәне. Ул 840 гектар урынына 847 гектар ер эшкәртте. Шартлы һәр бер тракторға 176-шар гектар ер эшкәртелде инде. 300 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды.

МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағы иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһына тапшырылды.

Министрҙең хатына яуап

«Горный труд» колхозының (Дәүләкән районы) председателе Ленин орденле иптәш А. С. Чередниченко Мәскәүҙән хат алды.

— «Һеҙҙе юғары награда — Ленин ордене алыуығыҙ менән ҡотлайым. Һеҙ, өлгәшелгәндәр менән генә тынысланмайынса, киләсәктә лә юғары урожай өсөн көрәштә тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға ирешерһегеҙ, тип ышаныс белдерәм. Үҙегеҙҙең эш тәжрибәләрегеҙҙе бөтә игенселәр менән уртаҡлашырһығыҙ һәм уларға юғары урожай алыуҙа ярҙам итерһегеҙ, тип уйлайым. Һеҙгә һаулыҡ, көс һәм эшегеҙҙә яңы уңыштар теләйем. СССР Ауыл хужалығы Министры И. Бенедиктов».

Хат бөтә колхозсылар араһында уҡылды. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле Ғөбәй Мифтахов һәм Поляков иптәштәрҙең бригадалары үҙ-ара ярышҡа сыҡтылар. Ҡыҫҡа ваҡыт эсендә бында 380 гектар бойҙай, 60 гектар һоло, 40 гектар көнбағыш, горчица сәселде. Колхоз иртә культуралар сәсеүҙе тамамлап, һуңғы культуралар сәсеү өсөн ер эшкәртә башланы.

Ғ. Идрисов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Туймазы игенселәре бөйөк вәғәҙәне үтәү өсөн көрәшәләр

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Быйыл Туймазы районы колхоздарында яҙғы сәсеү, үткән йылға ҡарағанда, юғарыраҡ темп менән алып барыла. 15 майға 19 колхоз иртә культуралар, 14 колхоз яҙғы бойҙай сәсеүҙе тамамланы. Хәҙер күп кенә колхоздар пландан тыш ашлыҡ сәсәләр һәм һуңғы культуралар өсөн тупраҡ әҙерләнә.

«Үрнәк» колхозы (председателе иптәш Иднатуллин) члендәре сәсеүҙе айырыуса уңышлы үткәрҙеләр. Бында бөтә иртә культуралар үҙ, шул иҫәптән пландан тыш сәселгән 40 гектар бойҙай һәм 30 гектар һоло ла яҡшы агротехник сроктарҙа сәселде. «Уңышҡа» колхозы ла (председателе иптәш Әхмәдиев) сәсеүҙе уңышлы үткәрҙе, пландан тыш ҙур ғына майҙанда бойҙай сәсте. Бында һәр бер колхозсы норманы арттырып үтәү өсөн тырышты.

Туймазы МТС-ы трактористары колхоздар менән төҙөшкән договорҙы баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк теүәл үтәү өсөн көрәшәләр. Үткән йылдың ошо ваҡытына эшләнгәнгә ҡарағанда, быйыл 1202 гектарҙа сәсеү, 1555 гектарҙа һөрөү һәм 1040 гектарҙа тырматыу артыҡ үткәрелде. Тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн бригадалар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Төнгө сменалар ойошторолдо. Комсомолец-йәштәр бригадаһында (бригадиры иптәш Сәдриев) шартлы һәр бер тракторға 103-әр гектар ер эшкәртелде. Хәсәнов, Вәлиуллин иптәштәр етәкселек иткән бригадалар ҙа алда баралар.

Эшләп сығарыу бында үҫкәндән-үҫә. Майҙың икенсе биш көнлөгөндә смена заданиеһен 22 тракторист кенә үтәй ине, хәҙер заданиеләрҙе арттырып үтәүселәр 45-кә етте.

Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта Туймазы районы игенселәре ҙур йөкләмәләр алдылар. Хәҙер уларҙы үтәү өсөн көрәш бара. Ике биш көнлөктә БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алған туймазылылар артабан да яҡшы эшләргә, 1948 йыл урожайының ныҡлы нигеҙен һалыу өсөн көрәште дауам итергә тейештәр.

Р. Камалов.

Ситтән генә ҡарап торалар

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Әбдрәшит МТС-ы быйыл яҙ үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 7 мең 900 гектар ер һөрөргә, 4 мең 200 гектар майҙанда ашлыҡ сәсергә договор төҙөшкәйне. Баҫыу эштәре башланыуға оҙаҡламай ай тула, ә договорҙың әле яртыһы ла үтәлгәне юҡ.

Был хурлыҡлы артта ҡалыуҙы МТС директоры иптәш Мөхәмәтов та һәм МТС-тың башҡа етәксе работниктары ла яҙҙың һуңлап килеүе, күпселек тракторҙарҙың иҫке булыуы менән аңлатмаҡсы булалар. Ләкин улар машиналарҙы нисек файҙаланыуҙары, трактор бригадаларына нисек етәкселек итеүҙәре һәм ниндәй техник ярҙам күрһәтеүҙәре турайында конкрет бер нәмә лә әйтә алмайҙар. Ул турала һөйләү өсөн нәмә булһа ла эшләнгән булырға тейеш бит. Ә ул бында күренмәй. «Марс» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Шаймәрҙәнов етәкселек иткән бригада тракторҙары һаҡһыҙ йөрөткәнлектән һәм техник тәрбиә насар булғанлыҡтан, күберәк тик ултыралар.

Яғыулыҡ булмағанлыҡтан 12 майҙа ике трактор тәүлек буйына эшләмәне. Өс аҙна эсендә улар менән ни бары 70 гектар ер һөрөлгән һәм шул тиклем генә сәселгән. «Балкан» колхозында эшләүсе иптәш Семенов етәкселек иткән трактор бригадаһы тағармасле ике трактор менән 15 көн буйына 24 гектар ер һөргән.

— Подшипниктар ирей, магнетолар эшләмәй, — тип, трактористар 10 көн буйына бер генә гектар ҙа ер һөрмәнеләр. Эшләгән көндә лә смена заданиеләрен үтәмәйҙәр. Был бригада МТС-тан 6 километр алыҫлыҡта ғына. Ләкин МТС-тың өлкән механигы иптәш Сенной ҙа, участка механигы иптәш Шпак та бында бер генә тапҡыр ҙа булғандары юҡ. Улар һәр ваҡытта был колхоздың урамынан үтеп йөрөйҙәр, ләкин тракторҙарҙы ситтән генә ҡарап үтәләр.

Эштең сифатына иғтибар биреүсе юҡ. Тракторист иптәш Ғәлиев 30 гектар майҙанда ерҙе 14 — 15 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрә. Насар тырматылған ергә ат сәскесе менән сәсә. Шуның һөҙөмтәһендә орлоктар күмелмәйенсә ҡала. Был колхозда МТС-тың участка агрономы иптәш Хәлимов та йыш ҡына була. Ләкин ул эштең сифаты менән ҡыҙыҡһынмай, үҙендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәй.

Тракторҙарҙың яртыһынан күбеһе, яҡтыртыу менән тәьмин ителмәгәнлектән, төнгө сменала эшләмәй. МТС етәкселәре төндә баҫыуҙа бөтөнләй булмайҙар, тракторҙарҙың эшләүен, йәки эшләмәүен тикшермәйҙәр.

Быйыл МТС яңы йыһазландырылған яңы күсмә мастерской алды. Ләкин ул күсмә мастерской ролен үтәмәй. МТС етәкселәре уны автомашина итеп файҙаланалар.

Трактористарға техник ярҙамдың булмауы, машиналарҙы тәүлек әйләнәһенә файҙаланмау һөҙөмтәһендә сәсеү графиге май айының икенсе һәм өсөнсө биш көнлөгөндә лә өҙөлдө. 10 майҙан 15 майға тиклем 1.800 гектар ер һөрөләргә, 1.200 гектар ашлыҡ сәселергә тейеш ине. Ләкин уның яртыһы ғына үтәлде. Дүртенсе биш көнлөк тә киткән һөҙөмтәкә бирмәне.

Әбдрәшит МТС-ындағы был тревогалы хәл район етәкселәрен дә борсомай.

Ғ. Ғәйнетдинова.

Уңыштар менән маһаймаҫҡа

Ҡандра районы 15 майға яҙғы сәсеү планын 47,8 процентҡа үтәп, райондарҙың социалистик ярышында дүртенсе урынды алды.

«Ҡыҙыл балыҡсы», «Ярыш», «Ҡыҙыл Октябрь», «Ҡандра Ҡотой», «Көрәш» колхоздары иртә культуралар сәсеү планын срогынан алда яҡшы сифатлы итеп үтәнеләр. «Ҡыҙыл балыҡсы» ауыл хужалығы артеленә (колхоз председателе иптәш Баязитов, партия ойошмаһы секретары иптәш Шайхетдинов) ВКП(б) район комитетының һәм район Советы башҡарма комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырылды. «Көрәш» колхозы члендәре лә алдынғылыҡ өсөн көрәшәләр. Был колхоздың 1000 гектар сәсеү планы булып, 15 майға уның 65 проценты үтәлде. Коммунист иптәш Хәликов етәкселек иткән бригада сәсеү планын тулыһынса үтәне. Хатта күп йылдарҙан бирле бөтә төр хужалыҡ эштәрендә артта ҡалып килгән «Иштуған», «Яңы тормош», «Урта ҡул», «Игенсе» колхоздары ла яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә гүзәл күрһәткестәр бирәләр. Сәсеү графигын биш көндән-биш көнгә арттырып үтәйҙәр.

Ләкин ҡайһы бер колхоз етәкселәре тәүге өлгәшеүҙәр менән тынысланып, уны артабан нығытмайынса, кирегенсә, темпты йомшарттылар. Мәҫәлән, Каганович исемендәге колхозда сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа үткәреү өсөн бөтә мөмкинлектәр бар ине. Баҫыуҙа 36 баш эш аты һәм 3 трактор эшләй. Ләкин улар тулыһынса файҙаланылмайҙар. Бында көн һайын кәмендә 30 гектар урынына, ни бары 18 гектар ашлыҡ сәселә. Һабансылар һәм сәсеүселәр араһында социалистик ярыш ойоштролмаған. Агитаторҙар үҙҙәренә тапшырылған эшкә яуапһыҙ ҡарайҙар. Агитаторҙарҙан Зарипова һәм Саттарова иптәштәрҙең баҫыуға барып та сыҡҡандары юҡ. Трактор бригадаһына беркетелгән агитатор иптәш Ғабдуллин дә трактористарҙың нисек эшләүҙәре менән ҡыҙыҡһынмай. Партия ойошмаһы секретары иптәш Уразаева агитаторҙарҙан конкрет эш талап итмәй, семинарҙар үткәрмәй.

Трактористарҙан Ғабдуллин, Исхаков, Идрисова, Хәсәншин иптәштәр смена заданиеләрен үтәмәйҙәр. Сәсеү башланғандан бирле тағармасле ике трактор менән ни бары 84 гектар ер һөрөлгән һәм 99 гектар ашлыҡ сәселгән. «Ҡыҙыл Октябрь» колхозында эшләүсе трактористар ҙа, трактор ваҡытлыҡ һыңтау яһап, бик насар эшләйҙәр. МТС-тың механиктары һәм директорҙың политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Хәжиев трактор бригадаларында бик һирәк булалар, уларҙың эштәренә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр.

Ҡандра районы колхоздарында сәсеүҙе тиҙ көндә тамамлау өсөн мөмкинлектәр бар. Колхоз һәм МТС етәкселәре уларҙы тулыһынса файҙаланып, сәсеү планының тиҙ көндә үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр.

Ш. Кильдияров.

РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ ХЕҘМӘТ ҠЫҘЫЛ БАЙРАҠ ОРДЕНЕ МЕНӘН НАГРАДЛАНҒАН НЕФТСЕЛӘРЕ

Һүрәттә (һулдан уңға): С. Г. Логинов — «Ишембайнефть» тресының өлкән мастеры, Ф. В. Кнутов — «Туймазынефть» тресының бораулау мастеры, В. Б. Корсунский — Өфө нефть эшкәртеү заводының баш инженеры, М. З. Мәүлютова — Өфө нефть ғилми-тикшеренеү институтының директоры, Д. Е. Бухов — «Ишембайнефть» тресының бораулау мастеры, К. Ғ. Ғабдуллин — «Туймазынефть» тресының бораулау мастеры, Е. Н. Варшавер — Ишембай нефть эшкәртеү заводының директоры.

Л. Яҡубов фотоһы.

Туған ҡалабыҙҙы төҙекләндереүгә бөтә көсөбөҙҙө мобилизовать итәйек!

Башҡортостандың баш ҡалаһы—Өфөнөң бөтә хеҙмәтсәндәренә Өфө ҡала Советы һәм ВКП(б)-ның ҡала комитеты МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Ҡәҙерле иптәштәр!

Большевиктар партияһы, Совет Хөкүмәте һәм личнэ иптәш Сталин беҙҙең республика хеҙмәтсәндәренең көн-күрешен яҡшыртыу тураһында көн һайын ғәмхорлыҡ күрһәтәләр. Бигерәк тә, уның баш ҡалаһы — Өфөнө төҙекләндереүгә айырыуса ҙур әһәмиәт бирәләр.

СССР Хөкүмәте быйыл Өфө ҡалаһын төҙекләндереүгә ҙур суммалы аҡса бүлде. Был средстволар торлаҡ фондтарына капиталь һәм ағымдағы ремонтҡа, водопровод һәм канализация селтәрҙәрен киңәйтеүгә, урамдарҙы, юлдарға һәм тротуарҙарға асфальт һәм таш түшәүгә, баҡсаларҙы һәм парктарҙы ремонтлауға һәм төҙекләндереүгә, биналарҙың фасадтарын, ҡапҡаларын һәм ҡоймаларын ремонтлауға һәм буяуға, урамдарҙы таҙартыуға, йәшелләндереүгә һәм яҡтыртыуға тотоласаҡ. Был эштәрҙе үтәү — өфөләрҙең ҙур эше. Үҙ ҡалаһын төҙекләндереү эшендә хеҙмәт менән ҡатнашыу — хәҙер Өфө ҡалаһы хеҙмәтсәндәренән бына ошо талап ителә.

Өфө — беҙҙең илебеҙҙең боронғо ҡалаларының береһе. Уның данлы тарихында бик күп революцион ваҡиғалар бар. Беҙҙең ҡала орденле Башҡортостандың политик һәм культура үҙәге, илебеҙҙең ҙур промышленность үҙәге. Беҙ Өфөнө матур, төҙекләндерелгән һәм культуралы, асфальтланған һәм баҡсалар, парктар, скверҙар менән йәшелләндерелгән ҡалаға әйләндерергә тейешбеҙ. Быны өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлек бар.

ВКП(б)-ның ҡала комитеты һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советы исполкомы туған ҡалабыҙҙы төҙекләндереү буйынса булған эштәрҙә иң актив рәүештә ҡатнашырға саҡырып, Өфө ҡалаһының бөтә хеҙмәтсәндәренә мөрәжәғәт итә. Ҡаланы төҙекләндереүҙә бер көндән дә ҡалмай һәр кеше ҡатнашырға тейеш!

Иптәштәр өфөләр!

Урамдарҙы, майҙандарҙы, ой алдарын таҙартыу, юлдар һәм тротуарҙарҙы ремонтлау, биналарҙың фасадтарын, ҡапҡаларҙы һәм ҡоймаларҙы буяу, ағастар һәм ҡыуаҡтар ултыртыу, клумбалар, сәскәлектәр булдырыу буйынса воскресниктәр ойошторайыҡ.

Порт управлениелары, урам комитеттары һәм райондар араһында төҙекләндереү буйынса иң яҡшы күрһәткестәр өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерейек!

Коммунистар һәм комсомолецтар!

Туған ҡаланы төҙекләндереү эше өсөн көрәшеүселәрҙең беренсе сафтарында булығыҙ! Үҙегеҙҙең шәхси өлгөгөҙ менән хеҙмәтсәндәрҙе был маҡтаулы эшкә рухландырығыҙ!

Комсомолецтар һәм йәштәр! Электростанцияларҙа ... комсомол-йәштәр ... ҡала ... үрнәк ... булығыҙ!

Пионерҙар, мәктәп уҡыусылары һәм совет уҡытыусылары! Техникум уҡыусылары һәм юғары уҡыу йорттарының студенттары! Ҡаланы төҙекләндереү эшендә актив ҡатнашыусылар булығыҙ! Үҙегеҙҙең уҡыу йорттарығыҙ янында тәртип урынлаштырығыҙ, баҡсалар, сәскәлектәр яһағыҙ, спорт майҙандары булдырығыҙ, ултыртылған йәшеллекте тәрбиәләүҙә һәм уларҙы һаҡлауға ҙур ярҙам итегеҙ.

Порт управлениеһы һәм урам комитеты членары! Һәр бер йорт управлениеһе эргәһендә төҙекләндереү эшенә ярҙам комиссиялары төҙөгөҙ, ой алдарында, подъездарҙа таҙалыҡ, тәртип булдырығыҙ, торлаҡ фондына һаҡлыҡ менән мөнәсәбәттә булығыҙ.

Предприятиелар һәм учреждениелар етәкселәре! Үҙ предприятиеларегеҙ һәм учреждениеларегеҙ янында тәртип һәм таҙалыҡ урынлаштырығыҙ, хеҙмәтсәндәрҙең хеҙмәте һәм йәшәүе өсөн сәламәт һәм культуралы шарттар тыуҙырығыҙ.

Санитария учреждениеларенең работниктәре! Ой алдарының, торлаҡ йорттарының, предприятиеларҙың, учреждениеларҙың һәм общественный ойошмаларҙың санитария торошона контролде яҡшыртығыҙ. Ҡала хеҙмәтсәндәренең һаулығы һеҙҙең эшегеҙгә бик бәйле икәнен хәтерҙә тотоғоҙ.

Водопровод, энергия селтәре һәм энергосбыт работниктәре! Ҡаланы өҙлөкһөҙ рәүештә һыу менән һәм электр энергияһы менән тәьмин итеп тороу өсөн максимум көс һалып эшләгеҙ. Авариялар булдырмау өсөн алдан саралар күрегеҙ. Ҡаланың нормаль тормошо һеҙҙең хеҙмәтегеҙгә күп яҡтан бәйле булыуын хәтерҙә тотоғоҙ.

Трамвай работниктәре! Трамвайҙың ыңғай эшләүе өсөн көрәшегеҙ! Трамвай паркын әйләнә-тирәһен таҙа тотоғоҙ. Пассажирҙарҙы культуралы хеҙмәтләндереүҙе тәьмин итегеҙ!

Партияның ҡала комитеты һәм ҡала Советы исполкомы, ҡаланың бөтә ойошмалары һәм граждандары был саҡырыуға конкрет эштәр менән яуап бирерҙәр, орденле Башҡортостандың баш ҡалаһы — Өфөнө төҙекләндереү өсөн көрәштә ҙур активлыҡ менән ҡатнашырҙар тип ышана.

ӨФӨ ҠАЛА СОВЕТЕ ИСПОЛКОМЫ.

ВКП(б)-НЫҢ ӨФӨ ҠАЛА КОМИТЕТЫ.

Экономика мәсьәләләре буйынса семинар

ВКП(б)-ның Киров район комитеты (Өфө ҡалаһы) экономика мәсьәләләре буйынса етәксе инженер-техник работниктар өсөн ике айлыҡ семинар ойошторҙо. Семинарға 80 кеше йөрөй.

Бында «Предприятиеның ойошторолош структураһы», «Предприятиела производство иҡтисаты», «Предприятиела хужалыҡ иҫәбе һәм финанс мәсьәләләре», «Промышленность предприятиеһының балансы һәм уның иҡтисаты» тигән темаларға бөтәһе 11 лекция уҡылған.

Район газеталары биттәренән

Колхозсылар инициативаһы

Мәкә районының Каганович исемендәге ауыл хужалығы артеле членалары ауылдарҙы төҙекләндереү өсөн социалистик ярыш ойоштороуға саҡырҙы, райондың бөтә колхозсыларына һәм колхоз активына «Баҫыу ударниге» газетаһы аша мөрәжәғәт итте.

«Беҙ үҙебеҙҙең мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпкә алып, — тип яҙалар колхозсылар мөрәжәғәттә, — ауылыбыҙҙы төҙекләндереү эшенә керештек. Быйыл колхоздар ... 1-се октябргә тиклем мәктәп, клуб һәм медпункт ... ремонт үткәрәбеҙ. ... 2 радио приемник алына».

Мөрәжәғәттә күрһәтелгәнсә, колхозға беркетелгән юлдарға, күперҙәргә ремонт үткәрелергә тейеш. ... Колхоз ... бөтәһе 2390 төп ағас ултыртыласаҡ.

Каганович исемендәге ауыл хужалығы артеле членаларының саҡырыуына «Юпитер», «Ударник», «Ҡыҙыл таң» һәм «Башҡортостан» колхоздары членалары районда беренсе булып яуап бирҙеләр. Улар үҙҙәренең яуаптарында — ... матур башлаҙығыҙ, беҙ уға бер тауыштан ҡушылабыҙ, — тип яҙҙылар. Хәҙер был колхоздарҙа урамдарҙы һәм йорт тирәләрен таҙартыу, йәшелләндереү, мәктәп һәм клуб биналарына ремонт үткәреү эштәре алып барыла.

Ауылдарҙы төҙекләндереү, культуралы ... «Баҫыу ударниге» газетаһында күтәрелгән был инициатива хеҙмәтсәндәр депутаттарының Боғдан ауыл Советы сессияһында махсус мәсьәлә итеп ҡаралды.

«Сессияла ауылдарҙы төҙекләндереү эштәре менән конкрет һәм оператив етәкселек итеү өсөн комиссия төҙөлдө һәм ул шул көндө үк эшкә керешә. Депутаттар ... Колхозсылар менән беседалар, йыйылыштар үткәрәләр».

Газета был инициативаны бөтә яҡлап яҡтыртып бик яҡшы эшләй.

Район яңылыҡтары

Баҫыусыларға совет сауҙаһы

Райпотребсоюз сельполар аркылы колхоз баҫыусыларына промышленность тауарҙары менән һатыу ойошторҙо. Майҙың 5-нән 6-һына тиклем 821 мең һумлыҡ тауар һатылды.

(Буздяк районы «Коммунага» газетаһы).

Культура йорто төҙөлә

Быйыл район үҙәгендә культура йорто һалыу өсөн хөкүмәт тарафынан 25 мең һум аҡса ебәрелде. Хәҙер төҙөлөш эше ҡыҙыу темп менән алып барыла.

(Хәйбулла районы «Ҡыҙыл байраҡ» газетаһы).

Экзамендәр һәм һынауҙар ҙур күтәренкелек менән бара

☆ ☆ ☆

Тәүге экзамен шатлығы

Мәктәп ишектәре асылғанға тиклем үк ҡаршылағы баҡсаға килеп туҡталған ҡыҙҙар, ҡулдарына тотҡан сәскә букеттәренә ҡарай-ҡарай, оҙаҡ ҡына бәхәсләшеп торҙолар.

— Букетте Кәримә апаның үҙенә бирәбеҙме, әллә дежурныйға ғына бирһәк тә ярармы?

— Әйҙә, Кәримә апаның өҫтәленә генә илтеп ҡуйбыҙ.

— Улай ни... Беҙ килтергәнде белеүсе лә булмаҫ.

— Беҙҙең класта булған бары бер түгел ти микән! — Һәм Фатима Мәғәсүмова үҙенең ялан сәскәләре букете тотҡан дуҫ ҡыҙы Ләләне эйәртеп, артҡы ишектән йүгерә-йүгерә мәктәп бинаһына инеп китте.

Ҡулдарына бәйләм-бәйләм сәскәләр тотҡан ҡыҙҙар һәм малайҙар залда берәү генә түгел ине инде. Улар бөтәһе лә, бер-береһен шул тиклем иртә уяныуҙары менән ҡотлаған кеүек итеп, күрештеләр, ҡул ҡыҫыштылар. Йөҙҙәрендә — шатлыҡ, ҙур эшкә тотоноу алдынан тоҡана торған ярһыу балҡый ине.

14-се номерле татар ете йыллыҡ урта мәктәбенең өс класында тәүге экзамендәр билдәләнгәйне. Звонок тауышы иртәнге сәғәт тап 9-ҙа был кластарҙың бөтә уҡыусыларын да үҙ урындарына саҡырҙы.

5-се класта ултырған 14 бала, уҡытыусының аяҡ тауыштарын ишеткәс тә, уны ҡаршылау өсөн урындарынан торҙо. Утыҙ ес йыл уҡытып, утыҙ өсөнсө тапҡыр үҙ уҡыусыларынан экзамен алырға ингән ҡарт большевик Кәримә ханым Мамлиева, балалар кеүек үк тулҡынланып, күкрәк тауышы менән әйтте:

— Быйыл беренсе тапҡыр экзамен тапшырырға килеүегеҙ менән ҡотлайым һеҙҙе, балалар. Уңыштар теләйем.

Уҡан һуң рус теленән үҙгәрыласаҡ яҙма эштең темаһын, был эште иксек яҡшы итеп үтәргә кәрәк икәнлеген һөйләп бирҙе. Яҙма эш—һорауҙарға яуаптар яҙыу рәүешендә, «Яҙ көнендә» тигән темала буласаҡ. Уҡыусылар класс таҡтаһында күрһәтелгән алты һорауға яуап бирергә тейештәр. Был һорауҙар ҡатмарлы түгелләр: яҙ көндәрендә көндәр һәм төндәр нисек була; нинди ҡоштар беҙгә осоп килаләр; колхозсылар ҡайҙа эшләйҙәр...

Һорауҙар ҡатмарлы түгел. Ләкин уларға яуап биргәндә үҙеңдең тел байлығыңды ла, грамоталылығыңды ла, — ҡыш буйына үтелгән материалды нисек үҙләштереүсеңде бөтә тулылығында күрһәтергә кәрәк.

Ҡыҙ балалар һәм малайҙар алдарында ятҡан ап-аҡ ҡағыҙ биттәренә эйелеп, уйға сумылып эшкә тотоналар. Иғтибар менән уйлайҙар, тырышып яҙалар. Уҡытыусы уларҙың нисек ултырыуҙарын, яҙыуҙарын күҙәтеп тора.

Яҙма эштәрен Фатима Мәғәсүмова, баҫыңҡы һәм һәр ваҡытта тыйнаҡлы ҡыҙ Рәйсә Ҡулдашева, етеҙ хәрәкәтле Нәнбәк Низамов беренсе булып уҡытыусыға тапшыралар. Башҡаларҙың эштәрен дә оҙаҡ көтөргә тура килмәне.

Бүлмә бушап ҡалғас махсус комиссия 5-се класс уҡыусыларының яҙма эштәрен тикшерергә тотона. Тырышып, иғтибар биреп яҙғандар! 14 уҡыусының береһенә лә насар билдәһе ҡуйырға тура килмәй. Ике уҡыусының эшендә бер генә хата ла юҡ, дүртеһенә—«яҡшы» билдәһе ҡуйыла, башҡаларҙың яҙма эштәрендә лә 2—3 хата ғына бар.

Ҡарт уҡытыусы Кәримә ханым Мамлиева шатлығын, тулҡынланыуын үҙ коллегалары алдында йәшереп тора алмай. Һәр уҡыусының яҙма эшен, тәү тапҡыр күргән кеүек һоҡланып, ҡабат-ҡабат ҡулына алып ҡарай.

...Башҡа кластарҙың уҡыусылары ла экзамендәрҙе яҡшы һөҙөмтәләр менән тапшырып, залға, унан һуң баҡсаға — иркен һауаға, йәшел киңлеккә сығалар. Уларҙың тәүге экзамен тапшырыу шатлыҡтарына тиңләшерлек бер нәмә лә юҡтыр кеүек...

Ғ. Әхмәтшин.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһы 15-се номерле татар мәктәбенең 5-се класс уҡыусылары экзамендә яҙма эш башҡаралар.

Х. Биҡҡулов фотоһы.

☆

Беренсе көн һөҙөмтәһе

Өфө ҡалаһы буйынса экзамен һәм һынауҙарҙың беренсе көнө һөҙөмтәһе мәктәптәрҙең был һынаулы осорға сериоз әҙерлек менән ҡаршылағанлыҡтарын күрһәтте. Экзамен тәртибен боҙоу фактылары булманы.

Ҡала буйынса экзамен һәм һынауҙарға индерелгән 1.200 уҡыусының 62-һе генә ауырыу йәки башҡа сәбәп менән һынауға килмәне. Бигерәк тә 1-се, 3-сө, 8-се, 9-сы, 15-се, 45-се урта мәктәптәрҙә һәм эшсе йәштәр мәктәбендә һынауҙар уңышлы үтте. Ҡала буйынса 2.641 дүртенсе класс уҡыусыһынан 2416-һы, 720 етенсе класс уҡыусыһынан 660-ы экзамен эштәрен уңышлы үтәне.

Ауыл мәктәптәрендә

Ауырғазы, Саҡмағош, Бүздәк райондарының бөтә мәктәптәрендә лә һынауҙар тулы әҙерлек менән башланды. Һынауҙарға һәм экзамендәргә барлыҡ уҡыусылар ҙа килделәр. Ауырғазы районы үҙәгендә 2 урта мәктәптең, Саҡмағош районының 6 урта мәктәбенең 10-сы класын тамамлаусылары зрелость аттестатына экзамендәр бирәләр. Тәүге көндә рус теленән сочинение булып, уҡыусылар бирелгән бөтә өс темаға ла яҙҙылар. Экзамендәр тәртибен боҙоуҙар юҡ.

Учалы урта мәктәбендә 10-сы кластар өсөн сочинение темаларе һуңлап алынды. Шуға күрә экзамен яҙма эштәрен урында һайлап алынған темалар менән башларға тура килде.

Ҙур ойошҡанлыҡ

Матрай районы мәктәптәрендә экзамендәр һәм һынауҙарҙың беренсе көнө ойошҡан рәүештә һәм ҙур күтәренкелек менән үтте. Экзамен тотоусы 7 һәм 10-сы кластар сочинениелар, ә 4-се класс уҡыусылары изложение яҙҙылар. Уларҙың бик күбеһе экзамен эште отлично һәм яҡшы билдәләренә башҡарҙы. Матрай һәм Юлдыбай ауылы мәктәптәре бигерәк тә яҡшы өлгәшеүҙәргә ирештеләр. Бында яҙма эштә бер генә бала ла насар билдә алманы.

—☆—

Йәш специалистар

Республиканың юғары мәктәптәрендә государство экзамендәре башланды. Медицина институтында экзамендең беренсе көндәре яҡшы һөҙөмтәләр бирҙеләр. Ағымдағы йылда медицина институты 272 кеше, 8 медицина техникумы 547 кеше тамамлап сығасаҡ.

* * *

Ауыл хужалығы институты ағымдағы йылда илгә 60 агроном, 35 зоотехник бирәсәк.

Ауыл хужалығы техникумдарынан 388 урта квалификациялы агрономдар, ветфельдшерҙар, зоотехниктар, умартасылар, йәшелсәселек агрономдары сығасаҡ. Шул уҡ ваҡытта 10 районда бер йыллыҡ ауыл хужалығы мәктәптәрен 870 кеше тамамларға тейеш.

Атаҡлы мастер

Ауыр тейәлгән йөк машинаһы, тау аша һуҙылған боролмалы юлдар буйлап, алға барҙы. Бортта килеүсе егеттәр әле бер яҡҡа, әле икенсе яҡҡа сайҡала бирел, шаулаштылар, ҡысҡырыштылар. Ҡаланан алыҫлашҡан һайын улар үҙҙәрен иркенерәк тоттолар, үткер һүҙҙәр әйтештеләр, юл буйынса ярышып, һүҙ көрәштереп килделәр. Тик кабина эсендә шофер менән йәнәш ултырып килеүсе Павел Прокофьевич Балабанов ҡына был тамашаға ҡатнаша алманы. Ул егеттәрҙең кәйефле булыуҙарын оҡшатты, ләкин күп шаулашыуҙарына асыуы килде. Сөнки уларҙың тауыштары мастерҙың фекер ебенә тоҡанайырға ирек бирмәй ине.

Тау артындағы ваҡ урманлыҡты үткәс, машина барышын әкренәйтте һәм уң яҡлап йәйелгән аҡланға туҡтаны.

Борт аша һикерешеп төшкән егеттәр ниндәйҙер хәл иткәс, аҡыллы һүҙ көткәндәге кеүек, яңы ғына кабинанан килеп сыҡҡан Павел Прокофьевич Балабановты әйләндереп алдылар.

— Ярай, башланыҡ. Хәйерле сәғәткә!

Ул аҡлан уртаһында мөһабәт ғорурлыҡ менән баҫып тороусы вышкаға табан атлай башланы. Егеттәр ҙә эйәрҙеләр. Ослайып күккә ашҡан селтәрлә вышка уларҙы тын ғына, әҙе генә ҡаршы алды. Егеттәр уның янында бәләкәйләнеп киткәндәй булдылар.

Бер кем дә өндәшмәне. Әллә нисек килеп сыҡты, һәр кем үҙе белеп эшкә тотондо ла китте. Вышкаға һөйәлгән йыуан торбаларҙың береһен һайлап алдылар ҙа, ҙур ҡыҫҡыстар менән ҡаптырып, юғары күтәрҙеләр. Үҙҙәре менән алып килгән махсус борауҙы уның түбән башына беркеттеләр ҙә, ергә һендерҙеләр. Бораүһе өҫкә менеп китте, ниҙер ҡороп, рәтләп төштө. Икенсеһе раствор менән маташты. Ҡалғандары вышка эсендәге артыҡ нәмәләрҙе таҙартып алдылар.

Бына вышка артындағы кочегарканан пар бөркөлдө. Иртәнге тынлыҡты боҙоп, ундағы мотор таҡылдай башланы. Балабанов егеттәренә әйәк осо менән ымлап алды ла, рубильникте баҫты. Вышка эсенә урынлаштырылған көслө мотор, ҡуҙғалып китергә теләмәгән үгеҙ тауышы сығарып, әйләнә башланы. Йыуан торба хәрәкәткә килде, ул үҙе өсөн билдәләнгән тапҡырҙа ғына әйләнә, үҙенең үткер тештәрен ер күкрәгенә батырып, кимерә башланы.

Егеттәрҙең йөҙөндә дәртләнеү сатҡылары күренделәр. Балабанов иркен һулыш алып ебәрҙе, егеттәренә эргәһенә үк килеп:

— Хәйерле сәғәттә, егеттәр,— тине.

— Шулай булһын.

Балабанов әле асып та ҡарамаған ер яңы журналын алды, уның беренсе битен асты. Эре хәрефтәр менән яҙып ҡуйҙы:

«Иртәнге 7 сәғәт 45 минут, 104-се буровой эшкә башланы. Забой—0. Бер сәғәт эсендә 2 метр ер үтелде».

* * *

Павел Прокофьевич Балабанов Октябрьскийға 1944 йылдың яҙғы айҙарында килде. Бында килгәндә инде уның елкәһендә нефть промыселдарында 15 йылға яҡын эшләп алған бай тәжрибәһе, 1938 йылдан бирле йөрөтә торған почетлы — мастер тигән исеме бар ине.

Павел Прокофьевич яңы нефть районына үҙе өсөн генә хас булған производство культураһы алып килде. Октябрьскийҙа уны иң культуралы мастер, тип йөрөтәләр.

Ул килгән йыл, Туймазы нефте өсөн боролош йылы булды. Девон нефте асылған йыл ине был. Эшлекле мастер, килгән көндән алып, девон скважиналарының береһен бораулау эшенә тотоноп китте һәм үҙенең бригадаһы менән тәүге көндәрҙән үк юғары күрһәткестәр бирә башланы. Айға 300—350 метр ер бораулап, иң алдынғы стахановсылар сафына баҫты.

Октябрьскийҙе әйләндереп алған буровойҙарҙа юғары тиҙлек менән бораулау өсөн көрәш уты тоҡанды. Атаҡлы мастер Куприянов бригадаһы станок-айға 500 метр бораулауға тигән бурыс ҡуйған. Комсомолец-йәштәрҙән торған Алексеев бригадаһы биш йөҙгә яҡынайып та килә. Кнутов бригадаһында һуңғы айҙа 480 метрға тиклем барып етә алғайнылар.

Балабанов бригадаһы 132-се скважинала ине ул саҡта. Бөтә трест буйынса күтәрелгән ҙур яңғын, уларҙы ла солғап алды. Ҡаланың ситендә, тау артында, хәҙерге өсөнсө промысел районындағы яңы буровойҙа көрәш башланды.

Был көрәш үҙенең гүзәл һөҙөмтәләрен дә алып килде. Улар айға уртаса 500 метр тиҙлектә бораулаштылар. Скважинаһы планда ҡаралған 178 көн урынына 108 көндә, йәғни срогынан 75 көн алда эксплоатацияға бирҙеләр. Был күрһәткестәр башҡаларҙың да иғтибарын йәлеп итмәй ҡалманылар.

Шунан улар яңы буровой ҡабул иттеләр. Шул уҡ тау артында, өсөнсө промысел районында 102-се буровой барлыҡҡа килде. Көрәштә алынған тәжрибәне бригада был буровойға ла күсерҙе. Ваҡытҡа экономия яһау иҫәбенә, бында ла яҡшы күрһәткестәр биреүгә иреште. Бригада айға 560 метр тиҙлек менән бораулай башланы.

Ана шулай сыныҡты уның бригадаһы. Ана шулай еңеү артынан еңеү яулап алдылар улар.

* * *

104-се буровой Балабанов бригадаһы тарафынан девонға бораулана торған һигеҙенсе буровой ине. Улар Туймазыла ошо уҡ состав менән ете девон скважинаһын эксплоатацияға тапшырғандар. Бөтәһе ун ике мең метрҙан артыҡ ерҙе тишеп, эскә ингәндәр. Күп нәмәләр тураһында һөйләйҙәр был цифрҙар. Бик күп йоҡоһоҙ төндәр, хеҙмәт шауына күмелгән көндәр тураһында һөйләйҙәр улар. Көрәш яҡҡыны йылытҡан ул цифрҙарҙы.

Яңы буровойға улар инде еңеүселәр булып килделәр. *Күкрәген кейереп баҫып торған оҙон вышка*ның эсенә тағы ҡайнар хеҙмәт шауы килтерҙеләр улар. Тәүге көндәрҙән үк унда Балабанов бригадаһына ғына хас булған ентекле, ныҡышмалы, дауамлы көрәш уты тоҡанды.

Тап 104-се буровойҙа эш башланған көндә уларға яңы хәбәр килтерҙеләр. Тәжрибәле мастер Куприянов станок-айға 1000 метр бораулауға мөмкинлек булыуы тураһында һүҙ күтәргән. Был хәбәрҙе әле ҡайһы бер бораулаусылар көлөп ҡаршы алғандар. Ҡайһылары асыҡ фекерҙәрен әйтергә икеләнгәндәр.

Ләкин Балабанов икеләнеп торманы.

— Был реаль цифр, — тине ул үҙенә генә хас булған ышаныслылыҡ менән. — Беҙҙең шарттарҙа айға мең метр бораулауға мөмкин буласаҡ.

Һәм ул үҙенең бригадаһы менән бергә, был яңы инициативаны күтәреп алыусыларҙың иң тәүгеһе булды. Ошо яңы буровойҙы, ул мең метр өсөн көрәш объекты итеп алды.

Буровойҙың эске резервтәре тағы бер тапҡыр барланды. Механизмдәр һәм оборудованиелар тағы бер тапҡыр тикшерелделәр. Эске мөмкинлектәр ошо идеяны тормошҡа ашырыу өсөн тупландылар. Улар 700 метр тиҙлек бирә алдылар.

Балабанов үҙ кешеләрен тағы ныҡышмалы көрәшкә өндәне. Ул инде көндөҙ ҙә, кис тә буровойҙан ҡайтмаҫ булды. *Икешәр,* есәр смена тоташтан буровойында ҡалды. Улар 800 метр тиҙлек биреүгә ирештеләр.

Бына бер ай үтте. Урта иҫәп менән алғанда айҙа дүрт көн эсендә улар 930 метр ер бораулағылар. Был Октябрьский бораулаусылары өсөн бик юғары күрһәткес ине. Ошо ай эсендә бындай уңышҡа бары тик Куприянов бригадаһы ғына ирешкәйне. Куприяновсылар турбина менән бораулап 970 метр ер үткәндәр ине.

Еңеү яҡынайҙы. Ләкин быны ныҡытырға һәм ошо күрһәткесте станок-айға мең метрға еткерергә кәрәк ине. Бригада тағы эшкә, көрәшкә ташланды.

Яңы буровойҙа ҡайнар көрәш дауам итә ине әле. Май айының яҡты иртәһендә Башҡортостан нефтселәре өсөн ҙур шатлыҡлы хәбәр килде. Алдынғы нефтселәргә хөкүмәттең юғары наградалары биреү тураһында Указ барлығын әйттеләр. Был Указда социалистик хеҙмәттең аңлы һалдаты, беренсе класс мастеры Павел Прокофьевич Балабанов та бар ине. Уға Ленин ордены бирелгән.

— Айға мең метр бораулау өсөн! — тип тамамланы ул һүҙен, ошо уңай менән ойошторолған митингыла ла. Бригадаһы уға алҡышлап ҡул сапты һәм егеттәр тоғро иптәштәрен ҡеүәтләп ҡысҡырҙылар:

— Даешь, мең метр!

Ҡирәй Мәргән.

Беҙҙең республикала

Шишмә районының «Алға» колхозында төшкө аш ваҡыты агитация-масса эштәре өсөн файҙаланыла. Был ваҡытта агитатор комсомолец иптәш Әхмәт Хәмитов ҡысҡырып газета уҡыуҙы ойоштора.

Һүрәттә: икенсе һәм өсөнсө баҫыусылыҡ бригадаларының членДәре агитатор иптәш Ә. Хәмитовтың беседаһын тыңлайҙар.

В. Жданов фотоһы.

Күсмә библиотекалар

Туймазы район библиотекаһының китап фонды йыл һайын арта бара. Хәҙер библиотекаларҙа 8 мең 888 китабы бар.

Библиотека мөдире иптәш Сафсова һәр йыл һайын яҙғы һәм йәйге баҫыу эштәре осоронда колхоздарға һәм трактор бригадаларына күсмә библиотекалар комплектовать итеп ебәрә. Быйыл яҙғы сәсеү эштәре башланыу алдынан ул колхоздарға 10, трактор бригадаларына 17 күсмә библиотека ойоштороп ебәрҙе.

Эшселәрҙең ялы

Ағымдағы йылда Черниковск нефть эшкәртеү заводының эшселәре, инженер-техник работниктары һәм хеҙмәткәрҙәренән 758 кеше санаторийҙарға, курорт һәм ял йорттарына ебәреләсәк. Шулар эсенән 123 кеше курорттарға, 270 кеше ял йорттарына, 365 кеше Ҡариҙел буйындағы тәнсанаторийға ял итәсәк.

Нефтселәрҙең балалары йәйге каникулдарын пионер лагерҙарында һәм балалар майҙансыҡтарында үткәрәсәктәр.

Филармония артистарының йәйге гастроле

Яҙғы сәсеү һәм йәйге эш ваҡытында колхозсыларҙы культуралы хеҙмәтләндереү өсөн филармония үҙенең артистарын республиканың райондарына ебәрҙе. Бригадалар Шаран, Бакалы, Ҡыйғы, Салауат, Архангель, Ғафури һәм башҡа райондарға киттеләр. Бер бригада ошо көндәрҙә республиканың алтын приискаларына гастролгә сыға.

Был бригадалар яңы программалар әҙерләнеләр. Концерттар ауыл клубтарында, трактор бригадаларында һәм баҫыу стандарында биреләсәк.

Башгосфилармонияның халыҡ бейеүҙәре ансамбле Сахалинға гастролгә китте. Ул унда 1 ноябргә тиклем буласаҡ.

В. Г. Белинский юбилейенә

Башҡорт государство республика библиотекаһы В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл тулыу көнөн билдәләүгә әҙерләнә. Бында Белинский тураһында доклад һәм әҙәби-музыкаль концерттан торған кисә үткәреләсәк. Белинский тураһында Ленин, Сталин һүҙҙәре, Белинский әҫәрҙәре һәм Белинский тураһындағы әҫәрҙәрҙән торған күргәҙмә һәм «Белинский тураһында классиктар» тигән плакат-иҫтәлек ойошторола.

Методистар һәм библиографтар кисә менән район библиотекаларына юбилейҙе үткәреүҙә ярҙам итеү өсөн доклад, лекция, беседаларҙың темаларын, Белинский тураһында әҙәбиәт исемлеген төҙөнеләр.

В. Еварестов.

Утыҙ районда китап магазины

Ағымдағы йылда Когиздың Башҡортостандағы бүлексәһе тарафынан утыҙ районда китап магазины асыласаҡ. Был магазиндарҙың күбеһе республиканың алыҫ райондарында, мәҫәлән, Учалы, Яңауыл, Тәтешле, Асҡын, Мәләүез һәм башҡа шундай кеүек райондарҙа асыласаҡ.

Был магазиндар асылыу менән райондарҙа бөтә мәктәптәрҙе дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптары менән тәьмин итеү эше ошо магазиндарға күсәсәк.

Яңы асыла торған магазиндарға ебәреү өсөн Когиздың Башҡортостан бүлексәһенә бер миллион һумлыҡ дәреслек һәм уҡыу әсбаптары алынды ла инде.

Совхозда

Ҡоруҫҡа исемендәге йәшелсәселек совхозы бөртөклө ашлыҡ культураларын сәсеүҙе тамамланы. 700 гектар һабан ашлығы буй-арҡыры ыҫулында сәселде.

Хәҙер бында картуф ултыртыу эштәре массовый рәүештә башланды.

Совхоз етәкселәре Өфө районының бер нисә колхозына яҙғы сәсеү буйынса практик ярҙам күрһәттеләр. Мәҫәлән, совхоздың тракторҙары «Большевик», Ворошилов, Молотов һәм Шевченко исемендәге колхоздарҙың ерен эшкәртә башланылар.

Ҡыуғын 6 көндә тамамланды

Ҡариҙел леспромхозының Комсомол һәм Абыҙ һал ағыҙыу участкаларында быйыл ҡыуғын ойошҡан рәүештә үткәрелде. Ҙур һәм бәләкәй Бердәш йылғалары буйҙарында леспромхоздың 600-ҙән даими эшсеһе ҡыуғын ваҡытында көн һайын таңдан алып ҡараңғы төшкәнгә тиклем эшләне. Запорщик Василий Орлов, Николай Баранов, йылғаға ағас төшөрөүселәр Зия Йосопов, Хәйбулла Фәтихов, Александр Кузнецов кеүек иптәштәр айырыуса юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге күрһәттеләр.

Ҡыуғынсылар араһында социалистик ярышты киң йәйелдереү, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә ҡыуғын срогынан күп алда, 9 майға тамамланды. Абыҙ участкаһы (начальнигы иптәш Выгузов) буйынса 12 мең 800 кубометр, Комсомол участкаһы (начальнигы иптәш Гробов) буйынса 5 мең 700 кубометр ағас ағыҙылды.

Ғ. Исмәғилов.

„Главснабпростың“ базаһы асылды

Өфөлә «Главснабпростың» базаһы асылды. Ул Башҡортостандағы бөтә мәктәптәрҙе күрһәтмә пособиелар менән тәьмин итеү бурысын үтәйәсәк.

Хәҙерге көндә базаға бер миллион һумлыҡ күрһәтмә пособиелар алынды. 200 мең һумлыҡ физика приборҙарының оҙаҡламай килеп етеүе көтелә.

Республиканың бөтә мәктәптәренә базалағы материалдарҙың каталогы ебәрелде. Заказдар килеү менән улар мәктәптәргә ебәреләсәк.

МТС-тарға яңы тракторҙар

Күптән түгел Дәүләкән станцияһына яңы маркалы тракторҙар килде. Шулар эсенән «СТЗ—НАТИ» маркалы 6 трактор Дәүләкән МТС-ына, «С—80» маркалы ике трактор Суыйнсы МТС-ына ебәрелде.

* * *

Бүздәк һәм Благовар райондарына ошо көндәрҙә генә 3 «СТЗ—НАТИ», улар «С—80» тракторы килтерелде. Был яңы тракторҙар Бүздәк, Благовар, Саҡмағош райондарындағы МТС-тарға ебәрелде. Хәҙер Благовар МТС-ы зонаһындағы колхоздарҙа «С—80» маркалы 4 трактор эшләй.

Емеш-еләк баҡсалары

Бишбүләк районының мәктәптәрендә быйыл массовый рәүештә емеш һәм декоратив ағастар, еләк ҡыуаҡтары ултыртыу эштәре алып барыла. Кинйәбулатов ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары 500 төп емеш ағастары һәм еләк ҡыуаҡтары ултырттылар. Уларҙың күбеһе крыжовник һәм ҡурай еләге. Бишбүләк ете йыллыҡ мәктәбе уҡыусылары 2 мең төп ағас ултырттылар.

СОВЕТ-АМЕРИКА МӨНӘСӘБӘТТӘРЕНӘ СИТ ИЛДӘРҘӘН ОТКЛИКТАР

Англия

ЛОНДОН, 20 май. (ТАСС). Англия матбуғаты Совет-Америка мөнәсәбәттәренә күп комментарийҙар бирә. «Дейли Уоркер» газетаһынан башҡа бөтә газеталар, Америка-Совет мөнәсәбәттәрен регулировать итеү тураһында Совет Хөкүмәте тәҡдимдәре, имеш, «пропагандистик аҙым» булып тора, тип тенденциоз рәүештә раҫларға маташалар.

Американың Мәскәүҙәге послы Смит һәм В. М. Молотов араһында белдереүҙәр алышыуға ҡағылып, «Таймс» газетаһы: «Ихтимал, аҡыллы уйлағанда Америка хөкүмәте һөйләшеүҙәр алып барыу тураһында совет килешеүен шул тиклем ҡапыл һәм ҡырҡа кире ҡағырға кәрәкмәй икәнлеген хәл итер» тип күрһәтә.

«Дейли Уоркер» газетаһы, Г. Уоллестең Асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндең яуап хатына комментарийҙар биреп, былай тип яҙа: «Сталин, фекер айырымлыҡтарын регулировать итеү буйынса Уоллес тарафынан күрһәтелгән конкрет программа Советтар Союзы менән Ҡушма Штаттар араһында килешеүгә яҡшы һәм уңышлы база булып хеҙмәт итәсәк, тип иҫәпләй».

«Бевин,—тип дауам итә газета, — бары тик Советтар Союзына ҡаршы йүнәлтелгән курсҡа ғына ышана. Ул халыҡ-ара эштәргә башҡа ҡараш нөктәһенән торол ҡарай алмай. Бевин Англияның бөтә донъялағы авторитетенә бик ҙур зыян һалды. Ул беҙҙе рустарға ҡаршы йүнәлтте һәм беҙҙе американдарға һатты, ә американдар иһә хәҙер уға кәмһетеп ҡарайҙар».

«Йоркшир пост» газетаһы Совет-Америка фекер айырымлыҡтарын регулировать итеү тураһында Г. Уоллестең Асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндең яуабы тураһында редакцион мәҡәлә баҫып сығара. «Россия менән Ҡушма Штаттар араһында, — тип яҙа газета, — шундай фекер айырымлыҡтары бар, уларҙы ғәҙәттәге дипломатик һөйләшеүҙәр барышында хәл итергә мөмкин, һәм был фекер айырымлыҡтарын хәл итеү бөтә донъялағы атмосфераны еңеләйтеүгә бик ныҡ ярҙам итер ине».

Чехословакия

ПРАГА, 19 май. (ТАСС). Чехословакия телеграф агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, кисә Праганың бөтә газеталары Генри Уоллестең Асыҡ хатына И. В. Сталин яуабының тулы тексын баҫып сығарғандар. «Руде право» газетаһы үҙенең баш мәҡәләһендә, И. В. Сталиндең яуабы тынычлыҡҡа ынтылыусы бик күп миллионлаған «ябай кешеләр» көтләргә тейешле булған ваҡиға, тип айырыуса билдәләй. Был яуап Советтар Союзының ныҡышмалы һәм фидаҡәр рәүештә тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе берҙән-бер бөйөк держава булып торғанлығын күрһәтә. Хәҙер үҙенең ысынлап та тыныслыҡ теләгәнлеген бөтә донъяға күрһәтеү өсөн нәүбәт Ҡушма Штаттар хөкүмәтенә килеп етте.

«Народни освобозени» газетаһы былай тип яҙа: «Молотовтың һәм Сталиндең яуабынан һуң халыҡ-ара хәл өсөн яуаплылыҡ тулыһынса Ҡушма Штаттарға төшөүе билдәле, сөнки Советтар Союзы тыныслыҡты тәьмин итеү һәм нығытыу өсөн, һәр төрлө фекер айырымлыҡтарын бөтөрөү өсөн бөтә нәмәне эшләне.

Австралия

СИДНЕЙ, 19 май. (ТАСС). Бөтә газеталар Уоллестең Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабын күренекле урындарҙа урынлаштыралар. «Сидней морнинг геральд» газетаһы И. Сталин яуабының тулы тексын һәм Уоллес хатының төп положениеләрен «Сталин АҠШ менән һөйләшеүҙәр башларға тәҡдим итә» тигән мәҡәлә баҫып сығарҙы. Башҡа газеталар ике документтең дә йөкмәткеһен тулыһынса баҫып сығаралар.

Франция

ПАРИЖ, 19 май. (ТАСС). Париж газеталары кисә Уоллестең Асыҡ хатына И. В. Сталиндең яуабынан өҙөктәрҙе комментарийһыҙ баҫып сығарҙылар.

Америка сенатында

ВАШИНГТОН, 19 май. (ТАСС). Сенаттың кисә булған ултырышында Брюстер (республиканец, Мэн штатынан), Уоллестең И. В. Сталинға яҙған Асыҡ хаты, АҠШ хөкүмәтенән рөхсәт алмайынса торол Америка граждандарына бәхәсле мәсьәләләр буйынса сығыш яһауҙар йәки хаттар алышыу юлы менән сит ил хөкүмәте менән бәйләнеш тотоуҙы тыйыусы законды боҙмаймы, тигән һорауҙы ҡуҙғатты. Брюстер 1799 йылда, йәғни бынан 150 йыл тип әйтерлек элек ҡабул ителгән Логан законы тип аталған законға һылтанды.

Атом энергияһы өҫтөнән эске контроль тураһындағы закондың авторы, сенатор Мак-Магон (демократ, Коннектикут штатынан), Уоллес менән И. В. Сталин араһында «ноталар алышыуға» һылтанып, Берләшкән милләттәр ойошмаһының атом энергияһы өҫтөнән контроль буйынса комиссияһындағы күпселектең тәҡдимдәренә ҡарата Советтар Союзының позицияһы Советтар Союзының үйҙарына хәл иткес тикшереү үткәреү булып тора, тип белдергәндән һуң, Брюстер был мәсьәләне күтәреп сыҡты. Мак-Магон Уоллес тотҡан позицияны «рустарҙың тышҡы политикаһына ярашлы» позиция тип критиковать итте.

Был айҡанлы Брюстер, әгәр ҙә Уоллестең һәм Сталиндең белдереүҙәрен «ноталар алышыу» тип характерларға мөмкин булһа, был «айырым кешегә» башҡа государстволар менән тышҡы политика мәсьәләләрен тикшерергә рөхсәт итмәүсе тейешле закондар менән тыйыла, тип раҫланы.

Юнайтед Пресс агентствоһының хәбәрсеһе Вашингтондан, Брюстерҙең сенатта яһаған сығышынан һуң государство департаменте вәкилдәре, Уоллес Логан законын иҙ ғына ла боҙманы, күрәһең, тип белдергәндәр, тип хәбәр итә. Был вәкилдәр, Уоллестең Асыҡ хаты менән тышҡы политика мәсьәләләре буйынса күп кенә американдар тарафынан һөйләнә торған телмәрҙәр араһында бер ниндәй ҙә айырма юҡ, тип белдерәләр.

Совет-Америка мөнәсәбәттәре тураһында Пертинакс

ПАРИЖ, 18 май. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһы Пертинакстың Англия-Америка мөнәсәбәттәренә арналған мәҡәләһен тапшыра.

Пертинакстың һүҙҙәренә ҡарағанда, Францияның общественный фекере АҠШ һәм СССР хөкүмәттәре араһында белдереүҙәр алышыу тураһында ТАСС агентствоһы тарафынан тапшырылған хәбәрҙе ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршылаған. «Дөрөҫ, — тип дауам итә автор, — сит ил эштәре министре Жорж Бидо рустар һәм американдар Париж хөкүмәте вәкилен ҡатнаштырмай, Франция интерестәре иҫәбенә Германияны аяҡҡа баҫтырыу тураһында һөйләшеп килешмәҫтәрме? — тип бер ни тиклем ҡурыҡҡанлығын йәшермәне. Лакин был ҡурҡыуҙы бик тар круттар ғына уртаҡлаштылар. Германияға ҡарата, Франция өсөн Лондон кәңәшмәһендә хакимлек итеүсе Англия-Америка концепцияһынан да насарыраҡ нәмәнең булыуы мөмкинме? — тип һорайҙар. АҠШ менән Советтар Союзының яҡынлашыуы Францияның имиңселеген кеcәйтмәйме ни? ТАСС үҙенең хәбәрен иғлан иткәндә күпселек француздар кисергән был хәл үҙе генә лә ҡәнәғәтләнеү тойғоһон етерлек дәрәжәлә аңлатасаҡ».

«Вашингтон хөкүмәте... эшләнгән нәмәнән баш тарта башлағас һәм Россия тарафынан әйтелгән уйҙарҙың үҙендә ҡасанда булһа булғанлығын инкар итә башлағас, — тип дауам итә Пертинакс, — француздарҙың һәм континенттең башҡа бик күп кешеләренең күңелдәре тағы ла нығыраҡ ҡайтты».

Был раҫлау тәнҡиттән түбән тора. 14 майҙа, пресс-конференцияла сығыш яһап, президент Трумэн һүҙ хөкүмәт оҙаҡ ваҡыттар буйынса уйлаған демарш тураһында бара, тип таныны. Хәҙер һөйләшеүҙәр башлар өсөн был белдереү етерлек булып тора.

«Ни өсөн АҠШ, 4 майҙа Беделл Смиттең Молотовҡа нота тапшырыуында кәүҙәләнгән инициативаны күрһәтте?» — тигән һорауҙы биреп, Пертинакс сәбәптәрҙең береһен Трумэндең иҫәптәрендә күрә. Трумэндең был иҫәбе Генри Уоллес менән көрәштә уны «төп дәлилдән» мәхрүм итеү, «ярашыуға өлгәшеү өсөн ҡулланыла торған бөтә нәмәләр ҙә һынап ҡаралды инде» тип әйтеүҙән тора.

Палестиналағы ваҡиғалар

ЛОНДОН, 17 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Тель-Авивтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөгөн Тель-Авивҡа дүртенсе тапҡыр һауа һөжүме ваҡытында биш истребитель урамдарға пулеметтарҙан атҡан. Самолеттарҙы зенит артиллерияһы уты менән ҡаршылағандар. Һауа һөжүме ярты сәғәт дауам иткән. Ҡорбандар бар.

ЛОНДОН, 18 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Ҡаирҙағы хәбәрсеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөгөн еврей самолеттары Ҡаирҙағы Гелиополис аэродромына һөжүм яһағандар. Египеттең зенит артиллерияһы ике самолетты атып төшөргән. Самолеттар ҡала урамына ватылып төшкәндәр.

Берләшкән милләттәр ойошмаһының атом энергияһы өҫтөнән контроль комиссияһы эшенең туҡтатылыуы

НЬЮ-ЙОРК, 18 май. (ТАСС). Берләшкән милләттәр ойошмаһының атом энергияһы өҫтөнән контроль комиссияһы атом энергияһы тураһындағы мәсьәләне артабан тикшереүҙе туҡтатыу һәм Генеральный Ассамблеяның алдағы сессияһына доклад тапшырыу тураһында икегә ҡаршы 9 тауыш менән ҡарар ҡабул итте.

АҠШ, Ҡушма Королевство һәм Франция тарафынан тәҡдим ителгән был ҡарарға Советтар Союзы һәм Украина ҡаршы тауыш бирҙеләр. Тауышҡа ҡуйыу алдынан совет делегаты А. А. Громыко телмәр менән сығыш яһаны. Был телмәрендә ул, ошо тәҡдимгә ҡаты ҡаршы килде һәм был атом энергияһы өҫтөнән халыҡ-ара контроль тураһындағы мәсьәләне хәл итеүҙе ҡатмарлаштырыр һәм тағы ла нығыраҡ ҡыйынлаштырыр ғына, тип күрһәтте. Советтар Союзының атом энергияһы өҫтөнән контроль тураһындағы мәсьәлә буйынса килешеүгә өлгәшеүгә йүнәлтелгән тырышлыҡтарына дөйөм характеристика биреп, А. А. Громыко АҠШ-тың политикаһын был килешеүгә өлгәшеүгә ҡамасаулаусы политика тип критиканы, һәм, Советтар Союзы атом энергияһын эшләп сығарыу өҫтөнән эффектлы халыҡ-ара контроль һәм күҙәтеү булдырыу яғында торҙо һәм тороуын дауам иттерә, тип өҫтәне.

А. А. Громыконан һуң сығыш яһаусы Канада вәкиле Макнотон һәм Франция вәкиле де Роз үҙҙәренең комиссия эшен туҡтатыуҙы талап итеп элекке дәлилдәрен ҡабатланылар. Һәм генеральный Ассамблеяның алдағы сессияһында атом энергияһы менән бәйләнешле мәсьәләләрҙе тағы ла киңерәк тикшерергә кәрәк, тип белдерҙеләр.

Ҡыҫҡаса тикшереүҙән һуң комиссия үҙенең эшен туҡтатыу тураһындағы тәҡдимде хупланы һәм ултырышын япты.

Бельгия компартияһының IX съезы

БРЮССЕЛЬ, 19 май. (ТАСС). 15 майҙан алып 19 майға тиклем Брюсселда Бельгия коммунистар партияһының IX съезы булды. Съезда 400-гә яҡын делегат ҡатнашты.

Бельгия коммунистәре партияһының генеральный секретаре Лальмандың отчет докладын тикшерҙеләр, 60 кеше составында Үҙәк Комитет һайланылар һәм үҙәк контроль комиссияһы члендарен яңынан һайланылар.

Съезда ҡатнашыусылар Софулис-Цалдарис хөкүмәте тарафынан үткәрелә торған террорға ҡаршы протест белдереүсе резолюция ҡабул иттеләр.

Съезда ҡунаҡтар сифатында Морис Торез етәкселегендә Франция коммунистар партияһы делегаттары, Польша, Румыния, Венгрия, Голландия, Великобритания, Швейцария, Люксембург, Испания, Италия һәм Югославия коммунистар партияларының делегаттары ҡатнаштылар.

Польшаның Ҡаирҙағы посланнигенең протесе

ЛОНДОН, 18 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Ҡаирҙан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Польшаның Тель-Авивтағы судноһын Египет самолетының бомбаға тотоуына ҡаршы кисә Польша посланнигы Египет сит ил эштәре министрына официаль протест тапшырған һәм яһалған зыяндың түләнеүен талап иткән. Был — Палестиналағы һуғыш хәрәкәттәре ваҡытындағы беренсе «халыҡ-ара конфликт» булып тора.

Бәләкәй фельетон

Самолет ҡайтанан килмәне...

Связь һәм санитария самолеттарын, яҙғы килер ҡоштарҙы һағынып көткән кеүек, көтөп алалар ине Бөрйән районы үҙәгендә. Әле бынан ике йыл элек кенә һауа яңғыратып осоп килә лә ине был самолеттар, ауыл ситенә йәки Ағиҙел арьяғындағы тау башына төшәләр ине. Тиҙәр юлдан алыҫ райондың кешеләре газеталарҙы баҫылып сыҡҡан көнөндә үк алып уҡыйҙар ине. Самолет республикабыҙ баш ҡалаһына ҡайтанан осоп киткәндә ашығыс медицина ярҙамына мохтаж ауырыуҙарҙы ла ултыртып ебәрәләр ине.

Бынан ике йыл элек связь эшендә самолеттарҙың ҡулланылыуына һоҡланмаған, шатланмаған кеше юҡ ине бында.

Ҡайһы саҡта айырым кешеләрҙең каприздарын ҙур ғына шатлыҡтарға ла тап төшә бит...

1946 йылдың яҙында райсоветҡа Өфө аэродромынан бик кенә һүҙлек телеграмма килде: «Тиҙҙән аэродром төҙөмәһәгеҙ, самолет ебәрмәйәсәкбеҙ». Был телеграмманы ашығыс киңәштәү итеп аңланылар. Бөтә ауыл халҡы тип әйтерлек нәүбәттәге ял көнөндә үк Ағиҙел арьяғындағы тау башына аэродром төҙөргә сыҡты. Балта оҫталары ла, тимерсеһе ҙә, аэродром төҙөү инструкцияһы менән ҡоралланған кәңәшселәр ҙә табылды. Һүҙ тейҙерерлек булманы: эш бөтә ҡағиҙәләрҙе лә еренә еткереп башҡарылды. «Ҡоштарҙы ла һоҡландырырлыҡ аэродром төҙөнек, — тинеләр бөрйәнлеләр. — Летчиктар маҡтап бөтә алмаҫтар инде».

Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, летчиктар аэродромды маҡтарға ла, унда осоп килергә лә ашыҡманылар. Һауала мотор тауышы тағы ла бер айҙан һуң ғына ишетелде һәм аэродромды ҡарарға ебәрелгән летчикте бары бер генә кеше — урманға утынға барған столовой эшсеһе Сәғитов ҡына күрҙе.

Сәғитовтың әйтеүенә ҡарағанда, эш былай булған: яңы төҙөлгән аэродром эргәһендә самолетты ултыртҡан летчик Федоров, тауҙарҙы һәм унда йәшәүсе кешеләрҙе тыҡы ҡыҫылғансы тиргәгән-тиргәгән дә, «район советына ҡайтып әйт: былдай аэродром беҙгә оҡшамай», тигән дә, башҡаса һүҙ оҙайтып тормай, самолетына ултырып осоп та киткән.

Бына шунан бирле Бөрйән районың самолет менән хеҙмәтләндереү тураһында бөтмәҫ-төкәнмәҫ бәхәстәр дауам итә. Район етәкселәре был мәсьәлә буйынса Өфө аэродромы хужалары менән дә һөйләшеп ҡаранылар, тейешле министерстволарға ла был турала хәбәр иттеләр. Бер төрлө юл менән дә эш сығара алмағас, бөтөнләй ҡул һелтәнеләр. Газета-журналдарҙы, хаттарҙы 15—20 көнгә һуңлап алыу файҙаһыҙға тауыш күтәреүҙән артығыраҡ булып күренде уларға. Ваҡытында ашығыс медицина ярҙамы күрһәтелмәү арҡаһында ғазап сигеүселәрҙең тауышына ла ҡолаҡ һалыусы булманы.

Район етәкселәре ҡул һелтәгән эшкә Өфө аэродромы хужаларының да бер ҙә иҫе китмәй. Уларҙың ҡулында бынан ике йыл элек ебәреп ҡайтарылған «тикшереүсенең» рапорты бар: «аэродром техникаһенсә оборудовать ителмәгән».

Мәсьәләнең төбөндә аэродромды оҡшатмау түгел, бәлки Өфө аэродромы етәксеһенең алыҫ районды хеҙмәтләндереү бурысын үҙ өҫтөнән төшөрөргә теләүе генә ятҡанлығы көн кеүек асыҡ.

Ғ. Бик.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Ошо укыу йорттарының кайныһында укырға теләйһең?

РСФСР урман хужалығы министерствоһы

ӨФӨ ЛЕСОТЕХНИК ТЕХНИКУМЫ

1948—49 УКЫУ ЙЫЛЫНА БЕРЕНСЕ ҺӘМ ӨЛКӘН КУРСТАРҒА УКЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ.

Техникум атас әҙерләүҙе механизациялау буйынса техник-технологтар, урман-һыу транспорты техниктәре әҙерләй.

Укыу срогы 4 йыл.

Ғаризалар почта аша (заказной хаттар менән) директор исеменә ебәрелә. Ғаризаға түбәндәге документтар теркәлергә тейеш: белеме тураһында таныкма (подлинникта), тыуыуы тураһында таныкма (подлинникта), автобиография, өс фотокарточка, военнообязанныйҙар өсөн ғәскәри хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында белешмә, һәм сәләмәтлеге тураһында белешмә.

Ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә.

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумдың беренсе курсына 7 йыллык мәктәп күләмендә дөйөм белеме булған 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклем СССР-ҙың бөтә граждандары (ике енес тә) ҡабул ителә.

Туры булмаған урта мәктәпте йәки 8 класты 1946—1947 укыу йылында отличнога тамамлаусы кешеләр һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Өлкән курстарға 10 класс күләмендә белеме булған һәм шундай ук типтағы техникумдың 1—2 курсын тамамлаған кешеләр һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Ҡабул итеү һынауҙары туры булмаған урта мәктәп күләмендә түбәндәге фәндәр буйынса үткәрелә: рус теленән (телдән һәм яҙма-диктант), математиканан (телдән һәм яҙма), СССР Конституцияһынан (телдән).

Техникумда укыусылар өсөн торлаҡ бар, постель бирелә һәм столовойҙа ес тапкыр туклану менән тәьмин ителәләр.

Укыуҙа өлгәшеүсе укыусыларға айына 140 һумдан алып 200 һумға тиклем стипендия бирелә.

Техникумды тамамлағас, йәш специалистар-техниктар төрлө крайҙарға һәм республикаларға эшкә ебәреләләр.

Түбәндәге адрес менән мөрәжәғәт итергә:

Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 15-се номерле йорт.

Дирекция.

Аксеноволағы ауыл хужалығы техникумы

1948—49 укыу йылына басыусылык һәм зоотехник бүлектәренә I курсына укыусылар ҡабул итә.

Техникум урта квалификациялы специалистар—агрономдар һәм зоотехниктәр әҙерләй.

Ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә. 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклем ике енес кешеләре лә ҡабул ителәләр. Ғаризаға түбәндәге документтар теркәлергә тейеш:

Ете йыллык мәктәпте тамамлау тураһында таныкма (подлинниктә);

Тыуыу тураһында таныкма (подлинниктә);

Автобиография;

Өс фотокарточка;

Хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында белешмә (военнообязанныйҙар өсөн);

Сәләмәтлеге тураһында белешмә;

16 йәшкә еткән кешеләр паспорттарын алып килергә тейештәр. Техникумға инеүсе бөтә кешеләр ете йыллык мәктәп күләмендә түбәндәге фәндәр буйынса ҡабул итеү һынауҙары бирәләр:

СССР Конституцияһы (телдән),

Рус теленән (телдән, яҙма-диктант),

Математиканан (телдән һәм яҙма).

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августа тиклем. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана. Ете йыллык мәктәпте «отличнога» билдәһенә тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр. Укыуҙа өлгәшеүселәргә стипендия бирелә. Техникум эргәһендә дөйөм торлаҡ һәм столовой бар.

Техникум адресе: Аксеново станцияһы, Куйбышев тимер юлы, Аксеново ауыл хужалығы техникумы.

Дирекция.

БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе

БАШКОРТОСТАН ГОСУДАРСТВО МУЗЫКАЛЬ УЧИЛИЩЕҺЕ

1948—49 укыу йылына укыусылар ҡабул итә.

Музыкаль училище оркестр һәм хор артистарын, йырсылар, пианистар, музыка укытыусылары һәм хор етәкселәре әҙерләй.

Училищеға 15 йәштән алып 25 йәшкә тиклемге һәр ике енес граждандары ҡабул ителә. Фортепиано һәм кыллы оркестр бүлектәренең 1-се курсына балалар музыка мәктәбенең ете йыллык музыкаль мәктәпте тамамлаған кешеләр ҡабул ителә. Духовой һәм вокальный бүлектәргә инеү өсөн махсус әҙерлек булыуы талап ителмәй. Укырға инеүселәр музыкаль яктан һәләтле булырға тейештәр.

Училищеға инергә теләүсе бөтә кешеләр ете йыллык мәктәп программаһы буйынса һынауҙар үтәләр. Һуңғы ике йыл эсендә урта мәктәптең 8, 9, 10 кластарын тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Укыу срогы 4 йыл. Укыған өсөн йылына 150 һум акса түләнә. Стипендия өлгәшеүгә карап бирелә. Пенсионерҙарҙың, Ватан һуғышы инвалидтарының балаларының, балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәрҙән укыған өсөн акса алынмай.

Ғаризалар һәм документтар 1 июндән 15 августка тиклем ҡабул ителәләр. Һынауҙар август айында үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Ҡабул итеү буйынса белешмәләр музыкаль училищеның канцелярияһында, йәкшәмбе көндән тыш, һәр көн һайын иртәнге 9 сәғәттән кискe 5 сәғәткә тиклем бирелә.

Ғаризалар һәм һорауҙарҙы түбәндәге адреска ебәрергә: Өфө калаһы, Пушкин урамы 83-сө номерле йорт, телефон номере 2—64—25.

Дирекция.



Өфө авиация техникумы. Г. Буравин фотоһы.

СССР Авиация промышленносе Министерствоһы

ӨФӨ АВИАЦИЯ ТЕХНИКУМЫ

1948—49 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Техникум авиация промышленносе өсөн техниктар-механиктар, **техниктар-конструкторҙар, техниктар-технологтар** әҙерләй.

Техникумдың беренсе курсына урта мәктәптең 7 класы күләмендә белеме булған һәр ике енес граждандары кабул ителә. Укыу срогы 4 йыл.

Урта мәктәптең 10 класын тамамлаусылар «махсус двигателдәр» бүлегенең айырым группаларына кабул ителәләр. Был группаларҙа укыу срогы ике йыл ярым.

Ғаризалар ҡабул итеү 5 августка тиклем.

Ғаризаға автобиография, белеме тураһындағы аттестат йәки таныкма (подлинникта), сәләмәтлеге тураһында справка, тыуыуы тураһындағы таныкма, 3 фотокарточка беркетелергә тейеш. Паспорт, хәрби билет йәки прописной таныкманы укырға килеүсе үҙе менән алып килергә тейеш.

Ҡабул итеү һынауҙары августың 5-енән алып 25-енә тиклем. Укыуҙар беренсе сентябрҙә башлана.

1947—48 укыу йылында урта мәктәптең 10 класын тамамлаусылар, шулай ук 7 йыллык мәктәпте отличнога тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Техникумға ҡабул ителгән кешеләр мәктәпте тамамлағанға тиклем Совет Армияһы сафына саҡырылыуҙан ҡотҡарылалар.

Ҡабул ителеүселәр 185—260 һум күләмендә стипендия менән тәьмин ителәләр. Отличниктар стипендияны 25 процентка артыҡ алалар. Техникум эргәһендә столовой бар.

Документтар ебәреү һәм белешмәләр алыу өсөн адрес: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 12-се номерле йорт, телефон номерҙаре: 2—83—58 һәм 2—80—89.

Ҡабул итеү комиссияһы һәр көн һайын иртәнге 9 сәғәттән алып киске 8 сәғәткә тиклем эшләй.

Дирекция.

Стәрлетамак государство укытыусылар институты

1948—49 укыу йылына тарих, тел һәм әҙәбиәт (рус һәм башкорт бүлектәре) физика-математика, тәбиғәт-география бүлектәренә

СТУДЕНТТӘР ҠАБУЛ ИТӘ.

Институтка тамамланған урта белеме булған, 17 йәштән алып 35 йәшкә тиклемге бөтә кешеләр ҡабул ителәләр. Ҡабул ителеүселәр түбәндәге фәндәр буйынса ҡабул итеү һынауҙары бирәләр: тарих, тел һәм әҙәбиәт бүлектәренә инеүселәр—СССР халыктары тарихенан, рус теле һәм әҙәбиәттән, географиянан; башкорт теле һәм әҙәбиәте бүлегенә инеүселәр—СССР халыктары тарихенан, рус теле һәм әҙәбиәтенән, географиянан, башкорт теленән; физика-математика бүлегенә инеүселәр — математиканан, физиканан, рус теле һәм әҙәбиәтенән; тәбиғәт-география бүлегенә инеүселәр — географиянан, химиянан, рус теле һәм әҙәбиәтенән.

1935 йылға тиклем 9 йыллык мәктәпте тамамлаусылар урта мәктәпте тамамлаусылар менән бер рәттән һынау бирәләр.

Отличниктар, 3 йыллык медицина мәктәбен тамамлаусылар һынауҙарҙы дөйөм нигеҙҙәрҙә бирәләр.

Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдар алып тамамлаусылар, шулай ук техникум һәм педучилищены отличнога тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Инеү тураһындағы ғаризалар, инеүсенең кайһы бүлектә укырға теләгәнлеге күрһәтелеп, институт директоры исеменә бирeләләр.

Ғаризаға автобиография, урта укыу йортон тамамлау тураһындағы аттестат (подлинникта), сәләмәтлеге тураһындағы справка, 3 фотокарточка (3×4 ҙурлығында) беркетелергә тейеш. Паспорт инеүсенең үҙе менән алып килене. Ғаризалар 20 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителәләр.

Ҡабул итеү һынауҙары августың беренән алып 20-һенә тиклем үткәрелә.

Институтка ҡабул итеү августың 21-енән 25-енә тиклем, ә алтын һәм көмөш медалдар менән наградланыусылар — 21 июндән алып 31 июлгә тиклем ҡабул ителәләр.

Мохтаж студенттар дөйөм торлаҡ, постель кәмәләре, дөйөм тукланыу менән тәьмин ителәләр.

Ғаризаларҙы түбәндәге адреска ебәрергә: Стәрлетамак калаһы, Пролетарская урамы, 73-сө номерле йорт, укытыусылар институты.

Дирекция.

ӨФӨ НЕФТЬ ТЕХНИКУМЫ

1948—49 УКЫУ ЙЫЛЫНА ТЕХНОЛОГИК ҺӘМ МЕХАНИК БҮЛЕКТӘРГӘ

УКЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ.

Техникум нефть эшкәртеү заводтары өсөн техниктар-технологтар, техниктар-механиктар әҙерләй.

УКЫУ СРОГЫ 4 ЙЫЛ. Беренсе курска 7—8 класс күләмендә, икенсе курска 9—10 класс күләмендә белеме булған кешеләр ҡабул ителәләр.

Ҡабул итеү һынауҙары түбәндәге фәндәр буйынса: рус теленән (телдән һәм яҙма), математиканан (телдән һәм яҙма), Конституциянан (телдән) үткәрелә.

Техникумдың беренсе курсына ҡабул ителеүселәр 285 һум, икенсе курсына ҡабул ителеүселәр—315 һум, механик бүлектең беренсе курсына ҡабул ителеүселәр 185 һум күләмендә стипендия алалар.

Ғаризалар 1 августа тиклем ҡабул ителәләр. Ҡабул итеү һынауҙары 1 августа башлана.

Ғаризаға белеме тураһындағы таныкма, тыуыуы тураһындағы таныкма, автобиография, сәләмәтлеге тураһындағы справка, 3 фотокарточка беркетелергә тейеш.

Техникумдың адресе: Черниковск калаһы, нефть техникумы.

Дирекция.

Академик И. М. Губкин исемендәге Мәскәү нефть институтының Өфөләге филиалы технологик һәм промысел механик факультеттәргә

Студенттәр ҡабул итә.

Институт Башкортостан һәм Көнсығыш районлары нефть промышленносе өсөн инженерҙар—специалистар әҙерләй.

Инеү тураһындағы ғаризалар 1948 йылдың 1 августына тиклем ҡабул ителәләр. Ғаризаға юғары укыу йорттарына инеү өсөн талап ителгән документтар беркетеләләр.

Ҡабул итеү һынауҙары августың 1-енән 25-енә тиклем үткәрелә.

Урта мәктәпте отличнога тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр. Укыуҙа өлгәшеүселәргә 290—395 һум күләмендә стипендия бирелә. Отличниктар стипендияны 25 процентка артыҡ алалар.

Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Белешмәләр алыу өсөн адрес: Башкорт АССР-ы, Черниковск калаһы, Мәскәү нефть институтының Өфөләге филиалы. Телефон номере 3—10—66.

Дирекция.

РСФСР ауыл хужалығы Министерствоһы

Йоматауҙағы умартасылык техникумы

1948—49 укыу йылына I-се курсна укыусылар ҡабул итә.

Техникумда укыу срогы өс йыл. Техникум урта квалификациялы умартасылык агрономдары әҙерләй.

Техникумға ете йыллык мәктәп күләмендә дөйөм белеме булған 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклем СССР-ҙың бөтә граждандары ҡабул ителә.

Техникумға инеүселәр түбәндәге фәндәр буйынса урта мәктәптең ете класы күләмендә ҡабул итеү һынауҙары бирәләр:

а) СССР Конституцияһы, б) рус теле, в) математика.

Техникумда укыусылар столовой һәм дөйөм торлаҡ менән файҙаланалар.

Стипендия менән тәьмин итеү дөйөм нигеҙҙә.

Ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә.

Ғаризаға түбәндәге документтар теркәлергә тейеш: белеме тураһында таныкма, тыуыуы тураһында свидетельство, ғәскәри хеҙмәткә мөнәсәбәте (военнообязанныйҙар өсөн) тураһында белешмә, өс фотокарточка, сәләмәтлеге тураһында врачтан белешмә.

Ҡабул итеү һынауҙары (саҡырыу буйынса) 1 августан 20 августка тиклем.

Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Дирекция.

РСФСР финанс Министерствоһы

ӨФӨ ФИНАНС ТЕХНИКУМЫ

1948—49 укыу йылына укыусылар кабул итә.

Техникум государство бюджете, государство доходтары һәм налогтар буйынса финанс работниктәре әҙерләй. Техникумға урта мәктәптең 7 класы күләмендә белеме булған, 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклемге бөтә граждандар ҡабул ителә. Ете йыллык мәктәпте отличнога тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр. Ҡалған бөтә кешеләр СССР Конституцияһы, рус теле (телдән һәм яҙма), математика (телдән һәм яҙма) буйынса ҡабул итеү һынауҙары үтәләр.

Инеү тураһында ғаризалар 1 июндән алып 20 августка тиклем ҡабул ителә. Ғаризалар директор исеменә бирeләләр. Ғаризаға белеме тураһында таныкма (подлинниктә), тыуыуы тураһында таныкма, автобиография, өс фотокарточка, сәләмәтлеге тураһында справка беркетелергә тейеш.

Ҡабул итеү һынауҙары 21—25 августа үткәрелә. Укыуҙар 1 сентябрҙә башлана. **Техникумда укыу срогы өс йыл.** Ҡабул ителеүсе бөтә кешеләргә стипендия бирелә. Районлардан килеүселәр дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәләр.

Техникумдың адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 15-се номерле йорт, телефон номере 2—62—63.

Дирекция.

Редакцияның адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙаре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00146 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 102 23 май йәкшәмбе

20 тин хаҡы

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Һәр бер тракторист һәм колхозсы сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп тамамлау өсөн көрәшергә тейеш! (1-се бит).
П. Горный. — Коммунистар һәм Ватан. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ф. Ғәләмов. — Баҫыу станында политик-массовый эш. Ә. Камаев. — Коммунистең урыны яҙғы сәсеүҙең хәл иткес участкаһында булырға тейеш. (2-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
БИШ ЙЫЛЛЫКТЫ — ДҮРТ ЙЫЛДА! Л. Гомберг. — Завод марҡаһының даны өсөн.
А. Ашин. — Йәш нефтселәр. М. Тажи. — Бригадир Ғәйнислам Әйүпов. (3-сө бит).
СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Ғ. Ашкрумов. — Тарынан юғары урожай алыу юлдары. (3-сө бит).
ФЕЛЬЕТОН. Ғ. Бик. — «Үлек килограммдар». (3-сө бит).
М. Афонин. — Халыҡ-ара күҙәтеү. (4-се бит).
Ә. Ишбулатов. — Балаларҙың туристик походтары. (4-се бит).

Көндөҙ ҙә, төндә лә һөрөргә!

Башҡортостан игенселәре бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ иптәш Сталинға яҙған хатта сәсеү майҙанын 488 мең гектарға арттырырға, бөртөклө ашлыҡ культураларының гектарынан уртаса 75-әр бот, ә арыштан һәм яҙғы бойҙайҙан унан да юғарыраҡ урожай алырға һүҙ бирҙеләр.

Был ҙур вәғәҙәне үтәү өсөн көрәштең хәҙер яуаплы осоро. Бирған һүҙҙәренә тоғро булған республикабыҙҙың игенселәре яҙғы сәсеү фронтында еңеүҙәр яулап алыу өсөн ныҡышмалы көрәш алып баралар. Алдынғы сафтарҙа — Туймазы, Белорет, Салауат, Балтач, Дәүләкән райондарының колхозсылары, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары, механизаторҙары һәм ауыл хужалығы специалистәре. Улар сәсеүгә төшөүҙең тәүге көндәренән үк баҫыу эштәрен юғары темп менән башланылар һәм хәҙер сәсеүҙе тулыһынса тамамлауға яҡынлашып киләләр.

Бөтә райондар ҙа, бөтә колхоздар ҙа алдынғылар кеүек эшләргә һәм яҙғы сәсеүҙе тиҙ көндәрҙә тамамларға тейештәр. Тик шул ваҡытта ғына алынған йөкләмәләрҙе үтәү, 1948 йылда юғары урожай үҫтереп алыу өсөн ныҡлы фундамент һалынасаҡ.

Үкенескә ҡаршы, күп райондар сәсеүҙе ҡәнәғәтләнерлек темп менән алып бармайҙар. Шуның һөҙөмтәһендә республика буйынса яҙғы сәсеү планы 20 майға ни бары 53 процентҡа ғына үтәлде. Мәләүез, Дүртөйлө, Балабай, Ауырғазы, Архангель райондары колхоздарында әле иртә культуралар сәсеү планы яртылаш та үтәлмәгән. Ә һуңғы культуралар өсөн ер әҙерләү тураһында бер төрлө лә хәстәрлек күрелмәй.

Яҙғы сәсеүҙә былай артта ҡалыу һәм һуҙлау юл ҡуйғыһыҙ эш. Иң яҡшы агротехник сроктар үтә. Бөтә райондарға ла, айырыуса артта ҡалған райондарға, ошо бер нисә көн эсендә һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе тамамлауға колхоздарҙағы, МТС-тарҙағы бөтә көстө тупларға кәрәк.

Сәсеү темпын төшөрмәйенсә, артабан уны тағы ла шығыраҡ күтәреү өсөн ер һөрөүҙе көсәйтеү айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Күпселек райондарҙа тунға һөрөлгән ер сәселеп бөттө. Хәҙер һабан ашлыҡ культураларын урынлаштырыу өсөн яңынан 654 мең гектар майҙанды һөрөргә кәрәк. Ҙур эш, ләкин уны уңышлы үтәргә бөтә мөмкинлектәр бар. Бының өсөн иң беренсе нәүбәттә колхоз, МТС һәм район етәкселәре һөрөүҙе яҡшы ойоштормайынса тороп, яҙғы сәсеүҙе артабан юғары темп менән алып барып һәм уны иң яҡын көндәрҙә тамамлап булмағанлығын аңларға тейештәр.

Республикабыҙҙың алдынғы трактористәре машина-трактор паркын файҙаланыуҙа гүзәл өлгөләр күрһәтәләр. Иптәш Сталинға яҙған хатта шартлы һәр бер тракторға 1500-әр гектар ер эшкәртергә йөкләмә алған Приют МТС-ының иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы инде трактор эштәренең яҙғы планын арттырып үтәне. Шартлы һәр бер тракторға 178-әр гектар ер эшкәртелде. Трактористәрҙән Зәйнуллин һәм Миннуллин иптәштәр сменаға 8 гектар урынына, 17—18-әр гектар ер һөрҙөләр.

Дәүләкән МТС-ының иптәш Желобецкий бригадаһы ла колхоз менән төҙөшкән договорҙы срогынан алда үтәүгә өлгәште. Бөтә трактор бригадаларынан бына улар кеүек эшләү талап ителә.

Ләкин күп МТС-тар һөрөүҙә лә, сәсеүҙә лә колхоздар алдындағы үҙ бурыстарын үтәмәйҙәр. Тракторҙар иҫ киткес насар файҙаланылалар. Бына Абзан МТС-ы. Бында «НАТИ» тракторҙарының һабандары юҡ, улар ат һабандары һәм лущильниктәр менән ер «һөрәләр».

Ошондай шарттарҙа яҡшы күрһәткестәргә, әлбиттә, өлгәшеп булмай. Ҡеүәтле тракторҙар менән көнөнә ни бары берәр гектар ер һөрөлә, ә 100-әр килограмм яғыулыҡ расходлана. МТС директоры Сабитов һәм уның политик эштәр буйынса урынбаҫары Ишбулатов иптәштәр машина-трактор паркын файҙаланыуҙа иҫ киткес ғәмһеҙлек күрһәтәләр, яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк үткәреүҙә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр.

Шулай уҡ Чурай, Мишкә, Йәрмәкәй, Аит, Һуҡайлы машина-трактор станциялары ла бик насар эшләйҙәр. Улар һөрөү планын ни бары 20—25 процентҡа үтәгәндәр. Шуның һөҙөмтәһендә был МТС-тар хеҙмәтләндергән колхоздар сәсеүҙе тамамлауҙан бик алыҫ торалар.

Һөрөүҙе аҡрын темп менән алып барыу — яҙғы сәсеүҙе өҙөү тигән һүҙ. Машина-трактор паркының һәм йәнле тартыу көстәренең ҙур өлөшө һөрөүгә күсерелергә һәм улар тулы нагрузка менән эшләргә тейештәр.

Көндөҙ ҙә, төндә лә һөрөргә кәрәк. Һәр бер тракторист смена нормаһын үтәү генә түгел, арттырып үтәргә бурыслы. Һауаның яҡшы тороуы бының өсөн тулы мөмкинлектәр бирә. Бөтә тракторҙы ла һабандар һәм төндә эшләү өсөн электр яҡтылығы менән тәьмин итергә кәрәк. Йәнле тартыу көстәре менән эшләгән алдынғы һабансылар көнөнә берәр гектар һәм унан да күберәк ер һөрәләр. Бөтә һабансылар ҙа улар кеүек эшләй алалар һәм эшләргә тейештәр.

Совет агрономияһы яң һөрөлгән ерҙе шунда уҡ тырмалап һәм сәсә барыуҙы талап итә. Шул ваҡытта ғына ерҙә дымды күберәк һаҡлап алып ҡалырға мөмкин. Быны иҫтән сығарырға ярамай. Бер генә звенола ла, бригадала ла һөрөү менән сәсеү араһында өҙөклөккә юл ҡуйылмаһын. Һөрөлгән һәр бер гектар шунда уҡ яҡшы итеп эшкәртелһен, сәселһен.

Яҙғы сәсеүҙең хәл иткес көндәре. Сәсеүҙе уңышлы тамамлау өсөн бөтә урындарҙа һөрөү темпын күтәрергә кәрәк. Партия, совет ойошмалары, ауыл хужалығы органдары һәм специалистәре, колхоз етәкселәре был бик мөһим эште уңышлы башҡарып сығыуҙы бөтә саралар менән тәьмин итергә бурыслылар.

Иптәш трактористәр, колхоз һабансылары! Һөрөүҙең юғары темпы һәм сифаты өсөн бөтә көсөгөҙҙө биреп көрәшегеҙ! Смена һәм көндәлек заданиеларҙы арттырып үтәгеҙ! Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин алдында, Тыуған илебеҙ алдында алған йөкләмәләребеҙҙең яҙғы сәсеү осоронда уңышлы үтәлеүен тәьмин итәйек!

Паровоздарға общественный смотр

Өфө паровоз депоһында йылына ике тапҡыр—яҙ һәм көҙ—паровоздарға общественный смотр үткәрелә. Иң яҡшы машинистәр, партия һәм профсоюз ойошмаларының вәкилдәре, йорт хозяйкалары составында төҙөлгән бригадалар паровоздарҙың техник һәм культура торошон тикшерәләр.

Деиола ошондай смотр күптән түгел булып үтте. Унда алдынғы паровозсыларҙан тыш актив йорт хозяйкалары Писарева, Хөснизалова ҡатнашты. Өлкән машинист Евдокимов, Гуськов, Озеров, Маслов, Афиногеновтарҙың локомотивтәре отлично баһа алдылар. Уларҙың машиналары бер ремонттан икенсе тапҡыр ремонтлауға тиклем нормаһан тыш 10 мең километр юл йөрөнөләр. Алдынғы машинистәр һуңғы ике ай эсендә ике йөҙ тонна самаһы күмергә экономия яһанылар. Тик бер өлкән механик Гуськов бригадаһы ғына апрель айында ҡышлыҡҡа 12 тоннанан артыҡ күмер запасҡа һалып ҡуйҙы.

Ошоноң менән бергә смотр комиссияһы өлкән машинист Яковлев, Ермолаевтарҙың паровоздары ҡәнәғәтләнмәҫлек рәүештә тотолоуҙарын билдәләп үтте. Общественный смотрҙың йомғағы Өфө депоһы паровозсыларының бөтә бригадаларында тикшерелде.

Таш күмер ятышы

Зианчура районының Мырҙабай ауылы территорияһында, 3—4 квадрат километр майҙанда һоро күмер ятышы табылды. Урыны-урыны менән уның ҡалынлығы 8 һәм 25 метрға етә. Тикшереү һөҙөмтәһе күмерҙең яҡшы сифатлы булыуын күрһәтте.

Һәр бер тракторист һәм колхозсы сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп тамамлау өсөн көрәшергә тейеш!

Өфө районы бойҙай сәсеү планын үтәне

Яҙғы бойҙай иң яҡшы агротехник сроктарҙа һәм яҡшы ныҡ әҙерләнгән ергә сәсеүҙе талап итә. Буденный, Молотов, Ворошилов исемендәге һәм башҡа күп кенә колхоздар үткән йылда тунға һөрөлгән ергә иртә сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп сәсеү арҡаһында бөтә майҙанда ла бойҙайҙың һәр бер гектарынан уртаса 13-әр центнер урожай алырға өлгәштеләр. Ә «Прожектор», «Красная звезда», Ҡуйбышев һәм Калинин исемендәге колхоздарҙа ашлыҡты бик һуң һәм яҙ һөрөлгән ергә сәсеү һөҙөмтәһендә һәр бер гектарҙан 3—4-әр центнер ғенә урожай алынды.

Ағымдағы йылда район яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын 5 мең 400 гектарға киңәйтте. Колхозсылар, ауыл хужалығы специалистәре, бөтә район эшсәндәре иптәш Сталинға яҙған хатта бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 80-әр бот, ә 2.300 гектар майҙанда яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан 132-шәр бот урожай алырға һүҙ бирҙеләр.

Юлбашсыға бирған вәғәҙәне тулыһынса үтәү өсөн колхоз баҫыуҙарында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Уҙған йылғы тәжрибәләрҙән сығып, быйыл бойҙайҙы иртә срокта һәм яҡшы сифатлы итеп сәсеүгә айырыуса ныҡ иғтибар бирелде. 20 майға районда бойҙай сәсеү тулыһынса тамамланды. Бөтәһе 11 мең гектарҙан артыҡ майҙанда бойҙай сәсеү үткәрелде. Быйыл бары тик кондициялы, сортлы орлоктар ғына сәселде. Бойҙайҙың 80 проценты тунға һөрөлгән, ә ҡалған өлөшө сөсөү ерҙәргә урынлаштырылды. Орлоктар ағыуланды, яровойлаштырылды, арҡыры-буй сәсеү юлы ҡулланылды.

Яҙғы бойҙайҙың һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға йөкләмә алған «Завет Ильича», «Смычка», Ворошилов исемендәге ауыл хужалығы артелдәре бойҙай сәсеүҙе башҡа колхоздарға ҡарағанда айырыуса иртәрәк сроктарҙа һәм яҡшыраҡ үткәрҙеләр.

Хәҙер күпселек колхоз баҫыуҙарында бойҙай матур һәм тигеҙ булып шытып сыкты. «Красный путь» колхозында Максимов һәм Фрунзе исемендәге колхозда Скорнякова иптәштәр етәкселек иткән звено членд'әре һәм башҡа күп звенолар бойҙайҙы өҫтәмә ашлауға әҙерләнәләр. Был саралар яҙғы бойҙайҙан юғары урожай алыуҙы тәьмин итәсәктәр.

Г. Ашимов,
Өфө районы ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы.

Өс көндә... дүрт гектар

АБЗАН. (Телефон аша). Абзан МТС-ы етәкселәре колхоздар менән договор төҙөшкән сакта яҙғы сәсеүҙе һәм шулай уҡ башҡа ауыл хужалығы эштәрен быйыл ойошҡан рәүештә үткәрергә, договорҙың һәр бер пунктын теүәл үтәргә һүҙ бирҙеләр. Колхоздарҙа шул нигеҙҙә производство пландары һәм яҙғы сәсеү эш пландары төҙелде.

Договорҙы үтәргә ваҡыт етте, баҫыуҙарҙа эш башланды, ләкин МТС-тың машина-трактор паркы тәүге көндәрҙән үк бурысын үтәүгә сиктән тыш насар әҙерләнгәнлеген күрһәтте. Күп кенә тракторҙар, сифатһыҙ ремонтланғанлыҡтан, шундуҡ уҡ ватылдылар, ҡайһы берҙәре баҫыуға һабандары булмай сыҡтылар. Төнгө смена әле бер ерҙә лә ойошторолмаған. Һөҙөмтәлә 20 майға һөрөү планы 36, сәсеү планы 29 процентҡа ғына үтәлде.

МТС директоры иптәш Сабиров эш һуҙҙағы береһенә:

— Быйыл МТС артта ҡалған колхоздарға айырыуса ныҡ ярҙам итәсәк. Уларҙы иң яҡшы трактор бригадалары хеҙмәтләндерәсәк, — тип торғайны. Был вәғәҙәһе буш һүҙ булып ҡына ҡалды.

«Асыҡ юл», «Урак», Хоҙайбирҙин исемендәге колхоздар йыл һайын хужалыҡ кампанияларын һуҙлап башҡаралар. Шуның һөҙөмтәһендә бик түбән урожай алына. Быйылғы яҙғы сәсеү осоронда ла улар артта ҡалалар. Төп сәбәп шунда: тракторҙар иҫ киткес насар эшләйҙәр. «Асыҡ юл» колхозына «НАТИ» тракторы 16 майҙа ғына ебәрелде, уның да һабаны юҡ. Колхоздарға ер һабансыҙ тағып һөрөргә мәжбүр булдылар. 3 көндә 4 гектар ер һөрөлдө. Ә колхозға яҡынан 130 гектар ер һөрөп сәсәһе бар.

Хоҙайбирҙин исемендәге колхозда ла шундай уҡ хәл. Бында ла яңы «НАТИ» тракторы һабанһыҙ. Ул лущильник менән «һөрә», 4 көн эсендә 11 гектар ер боҙҙо, шул уҡ ваҡытта 750 килограмм яғыулыҡ расходланды.

Ләкин бындай түҙеп торғоноҙ фактыларға МТС етәкселәре һис тә борсолмайҙар. Тракторҙарҙы ҡарап тәьмин итеү, эште тәүлек әйләнәһенә ойоштороу, машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн бер ниндәй ҙә сара күрелмәй.

Директор Сабиров бөтә ҙур етешһеҙлектәрҙе үҙе күрергә һәм төҙәтергә теләмәй менән бергә, колхоздарҙың законлы талаптарын да кире ҡаға.

— Мин үҙем беләм, минең эшемә ҡыҫылмағыҙ, — ти ул.

МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Ишбулатов та үҙ вазифаһын бик һалҡынлыҡ менән башҡара. Трактор бригадаларында политик-массовый эш алып барылмай. Смена нормаларын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн социалистик ярыш ойошторолмаған.

К. Сафин.

Агротехника менән иҫәпләшмәйҙәр

УСТЬ-ИКИН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Мәсетле районы колхоздарында яҙғы сәсеүҙең темпы түбән булыу менән бергә, сифатҡа ла иғтибар ителмәй.

«Ленин юлы», «Маяк» һәм «Берлек» колхоздарында бойҙайҙы яровойлаштырмайынса сәстеләр. «1 Май» колхозында (председателе иптәш Ширмаков) хатта орлок участкаһына ла 9 гектар бойҙай ҡул менән сәселде. Уның ере тәүҙә 5 көн буйына тырматылмай ятҡырылды, ә унан һуң насар эшкәртелде һәм орлоктоң 50 проценте ҡаҫ аҫтында ҡалды. «Маяк» колхозында ла (председателе иптәш Мөхәмәтов) 12 гектар майҙанда бойҙай орлогоноң күп өлөшө тупраҡҡа күмдерелмәне.

«Коминтерн» колхозында Усть-Икин МТС-ының иптәш Ниғмәтуллин бригадаһы тәгәрмәсле трактор менән, ашлыҡ сәсә башлағас, МТС директоры иптәш Соловьев:

— Трактор менән сәсеүҙе туҡтат. Юҡ иһә, тотолған яғыулыҡтың хаҡын үҙ өҫтөңә күтәртәм. Договорҙа колхозға ашлыҡ сәсеү эше ҡаралмаған. Беҙ тик ер һөрөргә тейешбеҙ, — тип, эште туҡтатты. Ә колхоз председателе иптәш Фәсхетдинов 40 гектар бойҙайҙы һәм 13 гектар борсаҡты ҡул менән сәстерҙе. «Серп и молот» колхозының председателе иптәш Крючков та, тракторҙың эшләмәүенә һылтанып, сәскес машинаһы булыуына ҡарамаҫтан, 104 гектар бойҙайҙы һәм 40 гектар борсаҡты ҡул менән сәсеүгә юл ҡуйҙы. Агротехниканы тупаҫ боҙоу фактылары шулай уҡ «Йолдоҙ», «Сулпан», «Урожай», «Аҡа», Туҡай һәм Киров исемендәге колхоздарҙа ла бар.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Усть-Икин һәм Мәсетле МТС-тарының участка агрономдары Сабиров һәм Максимов иптәштәр боҙоуҙарға килешеп ҡарайҙар.

Н. Ғәлимов.

Пәдлуб МТС-ында иптәш Һәдершин бригадаһы социалистик ярышта сәсеү башланғандан бирле беренселекте алып килә. Был бригаданың трактористәре смена һайын норманы арттырып үтәйҙәр. Трактористка Якупова көн һайын 15 гектар урынына, 26 гектар ер һөрә.

Һүрәттә: Трактористка иптәш Ғәфиә Якупова.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 20 майына, процентарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән	Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән
1.	Туймазы	75,4	64	33.	Бозаяз	50,6	36
2.	Белорет	69.9	89	34.	Благовещен	50,3	37
3.	Салауат	69,6	75	35.	Илеш	50,3	42
4.	Балтач	67,7	31	36	Ҡалтасы	50,7	38
5.	Дәүләкән	67,3	53	37.	Миәкә	50,2	42
6.	Баҡалы	65,1	27	38.	Йомағужа	50,2	43
7.	Яңауыл	65,1	27	39.	Федоровка	50,1	38
8.	Покровка	62,9	55	40.	Стәрлебаш	50,0	41
9.	Ҡандра	62,0	47	41.	Краснокам	49,5	44
10.	Аҫҡын	60,2	26	42.	Йәрмәкәй	49,2	36
11.	Борай	60,0	47	43.	Матрай	48,3	44
12.	Баймаҡ	59,2	68	44.	Ғафури	48,0	23
13.	Әбйәлил	57,7	57	45.	Иглин	48,0	41
14.	Өфө	57,5	49	46.	Мәсетле	47,9	47
15.	Бөрө	57,1	44	47.	Хәйбулла	47,5	42
16.	Ҡыйғы	56,9	76	48.	Нуриман	47,4	37
17	Белоҡатай	56,8	54	49.	Дүртөйлө	46,0	39
18.	Бүздәк	55,6	41	50.	Күйөргәҙе	45,2	35
19.	Шишмә	55,6	42	51.	Бишбүләк	44,3	34
20	Әлшәй	55,5	43	52.	Саҡмағош	44,2	37
21.	Шаран	55,5	37	53.	Ҡырмыҫҡалы	43,8	17
22.	Стәрлетамаҡ	55,0	50	54.	Архангель	42,6	32
23.	Байҡыбаш	54,7	51	55.	Ауырғазы	42,6	32
24.	Ҡариҙел	54,2	43	56.	Күгәрсен	42,0	32
25.	Дыуан	53,9	54	57.	Зианчура	42,0	31
26.	Тәтешле	53,4	46	58.	Балабай	41,4	31
27.	Маҡар	52,6	47	59.	Мәләүез	41,0	30
28.	Кушнаренко	52,5	33	60.	Абзан	40,1	36
29.	Мишкә	52,1	40	61.	Воскресен	38,0	32
30	Благовар	51,4	45	62.	Йылайыр	35,8	31
31.	Оло-Тиләк	51,2	41	63.	Бөрйән	35,5	9
32.	Учалы	51,2	67				

* * *

Майҙың дүртенсе биш көнлегендә сәсеү темпы, өсөнсө биш көнлеккә ҡарағанда, түбән төштө. 65 мең гектар ашлыҡ кәмерәк сәселде.

Республикала беренсе урынды алып килгән Туймазы районы һуңғы биш көнлектә лә яҡшы үҫеш бирҙе, бында һабан ашлыҡ майҙанының дүрттән бер өлөшө сәселде. Шулай уҡ Белорет һәм Салауат районы колхоздары ла ҡәнәғәтләнерлек эшләнеләр. Улар биш көн эсендә 23-әр процент үҫеш бирҙеләр һәм республикала икенсе һәм өсөнсө урындарҙы алдылар. Аҫҡын, Байҡыбаш, Ҡариҙел, Белоҡатай, Покровока, Дәүләкән, Өфө райондарында ла темп күтәрелә төштө.

Республикала төп игенселек райондары булған Мәләүез, Дүртөйлө, Саҡмағош, Бишбүләк райондарында дүртенсе биш көнлектә сәсеү бик түбән темп менән алып барылды. Улар биш көн эсендә ни бары 11—13 процент ҡына үҫеш биреү менән сикләнделәр. Архангель, Кушнаренко, Ғафури райондары ла темпты ҡырҡа түбәнәйттеләр.

Ҡайһы бер райондар темпты күтәреү урынына, хатта төшөрҙөләр. Ундайҙар рәтенә Матрай, Учалы, Йылайыр райондары инәләр.

Яҙғы сәсеүҙең хәл иткес көндәре килеп етте. Сәсеү темпын ҡырҡа күтәрергә кәрәк. Бының өсөн трактор һәм йәнле тартыу көстәрен яҙғы сәсеүҙә файҙаланыуҙы бик ныҡ яҡшыртыу талап ителә. Баҫыуҙа эшләгән һәр бер кешенең смена һәм көндәлек нормаларҙы арттырып үтәүенә өлгәшергә кәрәк.

Нормалар арттырылып үтәлә

АСҠЫН. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Муллаҡай» ауыл хужалығы артеле членд'әре яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн «Байҡал» колхозы менән социалистик ярышҡа сыҡҡайҙылар.

Колхозсылар ярышта алдынғылыҡты алыу өсөн арыу-талыуҙы белмәйенсә эшләйҙәр. Һабансыларҙан Зия Арсланов, Әхкәф Аҡбиров иптәштәр көн һайын 0,85 — 0,95 гектар ер һөрәләр. Сәсеүселәрҙән Ғарипов, Әхмәров иптәштәр ҙә уларҙан ҡалышмайҙар. Эш нормаларын көн һайын арттырып үтәйҙәр.

Эштә ҙур ойошҡанлыҡ һәм хеҙмәт дисциплинаһының ныҡ булыуы сәсеүҙең уңышын хәл итте. Колхоз районда беренсе булып иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы.

Ғ. Исмәғилов.

Коммунистар һәм Ватан

Хеҙмәтсән массалар Ватан тураһында, материаль һәм культура байлыҡтары менән, политик азатлыҡ һәм иминселек менән бөтә кешеләр ҙә файҙалана ала торған Ватан тураһында, шундай общество короләшо тураһында борон-борондан хыялланалар. Ҡол биләүселек короләшоида ла, феодализмда ла мохтажлыҡ һәм хоҡуҡһыҙлыҡ менән иҙелгән хеҙмәтсәндәрҙең ватандары булмаңы.

Массаларҙы феодализмға ҡаршы көрәшкә саҡырғанда буржуазия уларға яңы милли ватанда азатлыҡ, тигеҙлек һәм туғанлыҡ вәғәҙә итте. Был алдау булып сыҡты.

Буржуазия власка килгәс, хәҙер халыҡтың ватаны бар тип оятһыҙ рәүештә раҫланы, ә был ватанда ҡайһы синыф хужа булыуы тураһында өндәшмәне. Буржуазия үҙе байыу өсөн алып барған һуғыштарҙа иҙелгән синыфтарҙан былай буржуаз ватанды яҡлауҙы талап итә башланы.

«Ватанды яҡлау» лозунгыларының ялған характеры бигерәк тә империализм дәүерендә асыҡ күренде, ул саҡта уны талау һуғыштары алып барыу өсөн файҙалана башланылар. Хәҙер Америка империалистәре, иңы демократия илдәренә һәм милли азатлыҡ хәрәкәтенә ҡаршы көрәшеү өсөн донъя реакцияһы көстәрен туплап, бөтә донъяла берҙәм, башында Америка торған государство төҙөүҙе тәҡдим итеп, милли суверенитетте иҫкергән ҡалған идея тип иғлан иттеләр. Бындай шарттарҙа милли буржуазия үҙ халҡының интерестарын демократик көстәргә ҡаршы көрәште аҡса менән тәьмин итергә һәләтле булған империалистар төркөмөнә һата.

Францияның һәм Төркиәнең, Ҡытайҙың һәм Грецияның реакцион деятелдәре тураһында хурлыҡлы дан бөтә донъяға тарала, улар үҙ халыҡтарына ҡаршы аҡса тоғона эйә булған хөкүмәт менән һөйләшеп килешеүгә баралар. «...Эш синфи файҙаға ҡағылғанда, — тип яҙҙы Ленин, — буржуазия тыуған илен һата, һәм үҙ халҡына ҡаршы телһә нисдай сит кеше менән һатыулашырға тотона» (Әҫәрҙәр, XVIII том, 158-се бит).

Буржуазияның «ватан», «милли», «патриотик» идеологияһы пролетариатҡа илен яғынан баҫым яһау, халыҡ-ара пролетариаттың сафтарында тарҡаулыҡ, ығыш, милләттәр араһында айырылышыу һәм дошманлыҡ барлыҡҡа килтереү өсөн ҡорал булып хеҙмәт итә. Хеҙмәтсәндәрҙең ватаны бар инде тип, ә коммунистар имеш уны тартып алырға тырышалар тип күрһәтергә маташып, буржуазия коммунистарҙы ватандың дошмандары, халыҡтарҙың милли азатлығының һәм бойондороҡһоҙлоғоноң дошмандары тип иғлан итергә ынтыла. Империалистик буржуазия, компартияларҙың көсө һәм йоғонтоһо үҫеүен күреп, полиция һәм террористик саралар күреү менән бер рәттән, хәҙерге ваҡытта имеш пролетар интернационализм идеалдарына тоғро булған коммунистар үҙ илдәре милли интерестәренең вәкилдәре булып тормайҙар, тигән яла тарата. Империалист Даллес Парижда булған саҡында Франция компартияһына ҡаршы, ул «Францияныҡы түгел» — тип оятһыҙ сығыш яһаны. «Социалист» Л. Блюм ҡарт реакционер һәм һуғыш уты тоҡандырыусы У. Черчилль менән бер тауыштан Англия һәм Франция коммунистарен «Мәскәү партияһы» тип атай. Сит держава политикаһын тормошҡа үткәреүсе Италия премьер-министры де Гаспери шул уҡ ваҡытта йәнәһе Италия компартияһы «милли политика принциптәренән сығып эш итмәй...» тип раҫлай.

Маркс һәм Энгельс ватан тураһындағы мәсьәлә буйынса коммунистарҙың ҡараштарын боҙоп күрһәтеүсе оятһыҙ буржуаз яла яғыусыларға тейешле отпор бирҙеләр.

«...Коммунистарҙы, — тип яҙҙылар бынан йөҙ йыл элек Маркс менән Энгельс, «Коммунистар партияһы Манифесында», — йәнәһе улар ватанды һәм милләтте юҡҡа сығарырға теләйҙәр, тип шелтәләйҙәр.

Эшселәрҙең ватаны юҡ. Улардан булмаған нәмәләрен тартып алырға мөмкин түгел. Сөнки пролетариат, бөтәһенән элек, политик хакимлек яулап алырға, милли синыф кимәленә тиклем күтәрелергә, милләт булып конституцияланырға тейеш...»

Маркс менән Энгельс «эшселәрҙең ватаны юҡ» тип белдереп, бөтә илдәр эшселәренең халыҡ-ара солидарлығының бөйөк идеяһын иғлан иттеләр. Был белдереү буржуазияның ялған «патриотик» идеологияһынан һәр бер ил пролетариатының ҡырҡа рәүештә айырылыу маҡсаттарына хеҙмәт итә. Буржуазия үҙенең синфи комһоҙ интерестарен «милли берҙәмлеккә», «ватанды һаҡлауға», «милли интерестарҙың дөйөмлөгөнә» һәм башҡаларға ондау пәрҙәһе аҫтына йәшерә. Эшселәр синыфының буржуаз «ватан фронты» менән уртаҡ бер нәмәләре юҡ, тип һәм пролетариат, буржуазияны ҡыуып төшөрөп, милләт башында үҙе торорға тейеш, тип әйтеп Маркс менән Энгельс пролетариаттың гегемонияһы тураһында — бөтә иҙелеүселәрҙең һәм эксплоатацияланыусыларҙың юлбашсыһы булыуы тураһында үҙҙәренең учениеларын тәүге күрһәтеүселәр булдылар.

В. И. Ленин, фәнни коммунизмдең нигеҙен һалыусыларҙың учениеһын яңы тарихи шарттарҙа үҫтереп, капитализм [illegible] тураһында Маркс менән Энгельс белдереүен тарих дөрөҫләгәнен күрһәтте. Ләкин, — тип [illegible] пролетариат [illegible] нәмә [illegible] пролетариаттың гегемонияһы тураһындағы, эшселәр синыфының ватанға мөнәсәбәте тураһындағы төп положениеларҙы билдәләп, Ленин 1908 йылда былай тип яҙҙы: «Ватан, йәғни шул политик, культуралы һәм социаль среда, пролетариаттың синфи көрәшендә иң ҡеүәтле фактор булып тора... Пролетариат үҙенең [illegible] ватанға [illegible] ҡарай алмай» (Әҫәрҙәр, XII том, 314-се бит). [illegible]

1914 йылда буржуаз матбуғат, шовинистик һөрәм менән иҫереп, революцион социал-демократтарҙы [illegible] милли ғорурлыҡ тойғоһо революцион социал-демократтарға ят икән, тип һөрән ҡыла башланы (буржуазия һәр милли ғорурлыҡты империалистик һуғыштағы [illegible] ғына бар, тип таныны). Ленин «Великорустарҙың милли ғорурлығы тураһында» тигән мәҡәләһендә [illegible] буржуаз идеологтарына [illegible].

«Беҙгә, — тип яҙҙы ул, — аңлы великорус пролетарийҙарына милли ғорурлыҡ тойғоһо ятмы ни? Әлбиттә юҡ! Беҙ үҙ телебеҙҙе һәм үҙ тыуған илебеҙҙе яратабыҙ, беҙ бөтәһенән дә күберәк уның хеҙмәтсән массаларын [illegible] демократтарҙың һәм социалистарҙың аңлы тормошҡа күтәреү өсөн эшләйбеҙ. [illegible] (Әҫәрҙәр, XVIII том, 81-се бит).

Ленин һәм Сталин массаларға, үҙ тыуған иленә ысын пролетар мөхәббәт [illegible] мөмкин [illegible].

1917 йылда Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының еңеүе һөҙөмтәһендә элекке иҫке батша Россияһы урынына эшселәр һәм крәҫтиәндәрҙең социалистик ватаны барлыҡҡа килде. Ленин әйткәнсә, «Ватан булыу яғынан социализм» барлыҡҡа килде. Кешелек тарихында тәү башлап хеҙмәтсәндәрҙең ватаны барлыҡҡа килде. Бөтә хеҙмәтсәндәрҙең шундай ысын ватаны [illegible] эшселәр синыфының һәм уның коммунистик партияһының бөйөк тарихи батырлығы булды.

«Элек беҙҙең ватаныбыҙ булмаған һәм булыуы ла мөмкин түгел ине. Ләкин хәҙер, беҙ капитализмды [illegible] власть эшселәр [illegible] булғас, — беҙҙең ватаныбыҙ бар һәм беҙ уның бойондороҡһоҙлоғон яҡлаясаҡбыҙ», — тине иптәш Сталин.

Һәм бына 30 йылдан артыҡ беҙҙең халҡыбыҙ Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә рухланып һәм ялҡынлы патриотизм менән ватандың экономик һәм оборона ҡеүәтен нығыта һәм арттыра һәм дошмандарға ҡаршы һуғыштарҙа ватанды яҡлай.

Хәҙерге заман политик обстановка, эшселәр синыфы үҙен азат иткәс кенә ватанлы була алыуҙары тураһында марксистик-ленинсе идеяларҙың тәрән рәүештә дөрөҫ булыуын ҡат-ҡат раҫлай. Көнсығыш Европа илдәре, демократия һәм социализм юлына баҫып, үҙҙәре өсөн милли бойондороҡһоҙлоҡ һәм суверенитет тәьмин иттеләр, ә был илдәрҙең халыҡтары үҙҙәренә ватан таптылар. Шул уҡ ваҡытта капиталистик илдәр барған һайын Американың агрессив империализмы власе аҫтына эләгәләр, үҙҙәренең милли һәм государство бойондороҡһоҙлоғон юғалталар.

* * *

Буржуазия коммунистарға яла яға, уларҙы тик синфи-пролетар интерестар тураһында ғына хәстәрлек күрәләр, тип, уларға халыҡтың тотош милләттең интерестәре бары бер, улар, коммунистар, йәнәһе «милләтлекте юҡҡа сығарырға» теләйҙәр, тип ғәйепләйҙәр.

«Милләтлекте юҡҡа сығарыу» — ул коммунистарға тупаҫ һәм аҡылһыҙ рәүештә яла яғыу. Коммунистар милләтте «бөтөрөүгә» түгел, ә милли мәсьәләне пролетар интернационализм рухында хәл итергә, йәғни милли һәм раса тиңһеҙлеген, изелеүҙе һәм көсләүҙе бөтөрөүгә, милләттәрҙең тиң хоҡуҡлылығын һәм дуҫлығын булдырырға саҡыралар.

Милли мәсьәлә СССР-ҙа гүзәл рәүештә хәл ителде. СССР-ҙа халыҡтарҙың милләттәр араһындағы дуҫлығы—ул саҡырыу түгел, лозунг түгел, декларация түгел, ә реаль совет ысынбарлығы.

Социализм милли айырымлыҡҡа, дошманлыҡҡа һәм халыҡтар араһында ышанмаусылыҡҡа сик ҡуя. Социализмда милли культураларҙың бер-береһе менән байланешеүенең һәм үҙ-ара байығыуының тәрән процессы була. Милли культураларҙың иң яҡшы хазиналары милли [illegible]ҙең һәм талантлыҡ гениаль ижады социализмда бөтә халыҡтыҡы булып әүерелә. Элек артта ҡалған милләттәрҙең һәм халыҡтарҙың алдынғы рус культураһына ҡушылыуы СССР-ҙа шулай барлыҡҡа килде. Икенсе яҡтан, Шота Руставелиҙең, Алишер Навоиҙең, Низамиҙең һәм башҡа күптәрҙең һоҡланғыс ижадтары рус милләтенең миллиондарса хеҙмәтсәндәре өсөн дә яҡын булып әүерелделәр. СССР-ҙың бөйөк тәжрибәһе, милли азатлыҡ тик социализмда ғына мөмкин икәнен күрһәтә. Социализм милләттәрҙе юҡҡа сығармай, милли культураларҙы кисәкмай ғына түгел, бәлки, киреһенсә, уларҙың тулы үҫеүенә һәм сәскә атыуына мөмкинлек тыуҙыра. Капитализм шарттарында колонияла һәм кеселәрәк милләттәргә буйһоноуға хөкөм ителгән милләттәр социализм шарттарында яңы тормошҡа күтәрелләләр. СССР-ҙың күп ваҡ милләттәре совет власендә үҙҙәренең яҙмаларын булдырҙылар, үҙҙәренең туған әҙәби телдәрен тыуҙырҙылар, иң алдынғы социалистик культураларға эйә булдылар һәм фәндең, техниканың һәм художестволы ижадтың төрлө өлкәләрендә үҙҙәренең эшмәкәрлеген күрһәттеләр. СССР-ҙың элек артта ҡалған күп халыҡтарының милли культураһы хәҙер, капиталистик донъяның «цивилизациялы» тип аталған күп кенә государстволарының культураһынан бик күп юғары тора.

Капитализм — милләттәрҙең дошманы, уларҙы ҡыҫыусы, милли культураларҙы быуыусы. Ул милләттәр араһында яһалма рәүештә кәртәләр булдыра, халыҡтарҙың үҙ-ара аралашыуына һәм яҡынлашыуына юл ҡуймай. Америка империализменең яҡлаусылары һәм уларҙың инглиз-француз ялсылары хәҙер границаларҙы бөтөрөү, милли суверенитеттән баш тартыу тураһында һөйләнәләр. Был ни өсөн эшләнә? Халыҡтарҙы яҡынлаштырыу, туғанлаштырыу өсөн түгел, ә хәҙерге суверенный государстволарҙы АҠШ колонияларына әйләндереү өсөн шулай эшләнә.

Ысынбарлыҡ ғәмәлдә кемдең милли бойондороҡһоҙлоҡто яҡлаусы һәм уның өсөн әҙмә-әҙлекле көрәшсе булыуын күрһәтте. Пролетариаттың, бөтә эксплоатацияланыусыларҙың һәм иҙелеүселәрҙең авангарды—тик бөтә донъяның коммунистәре генә «фашистик режимға ҡаршы, халыҡтарҙың азатлығы өсөн көрәштә ышаныслылар, батырҙар, үҙ-үҙҙәрен аямаусылар булып сыҡтылар» (Сталин).

Немец-фашист агрессияһына ҡаршы халыҡтарҙың бөйөк көрәшендә бөтә илдәрҙең коммунистәре халыҡтың оккупанттарға ҡаршы тороуын башлап барыусылар һәм ойоштороусылар булдылар. Францияның, Польшаның, Югославияның, Чехословакияның, Ҡытайҙың, Грецияның һәм башҡа илдәрҙең коммунистәре, уларға Маршалл планы, Трумэн доктринаһы рәүешендә, асыҡтан-асыҡ Америка интервенцияһы рәүешендә ҡурҡыныс һалыусы сит ил ҡоллоғона ҡаршы үҙ халыҡтарының көрәшенә хәҙер ҙә етәкселек итәләр.

Европаның күп кенә илдәренең компартиялары массовый булып әүерелделәр. Был партияларҙың һан яғы ғына ла, уларҙың ысындан да халыҡ, милли партиялар икәнлектәрен күрһәтә. «Коммунистар Союзы» тапшырыуы буйынса Маркс менән Энгельс «Коммунистик партия манифесе» яҙған ваҡытта «Коммунистар союзында» бөтә Европаға 300 кеше булған. Ә хәҙерге ваҡытта Европала 14 миллиондан артыҡ коммунист бар.

Бөтә донъяла миллиондарса халыҡ массаһы ирклек һәм милли бойондороҡһоҙлоҡ өсөн бөйөк азатлыҡ хәрәкәтенә ҡушыла. Пролетариаттың, милләттәренә ҡарамаҫтан, бөтә хеҙмәтсәндәрҙең интерестарен яҡлауға юнәлтелгән был бөйөк хәрәкәтендә, — коммунистар авангардта баралар.

П. ГОРЦЫЙ.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Әҙерлекһеҙ үткәрелгән йыйылыш

Күптән түгел Ишембай машиналар төҙөү заводының тимерлек цехында партия группаһының йыйылышы булып үтте. Көн тәртибенә «Коммунистарҙың производствола авангардлыҡ ролдәре» тигән бик мөһим мәсьәлә ҡуйылғайны. Был йыйылышҡа килгәндә коммунистар «үҙебеҙҙең айырыуса яҡшы эшләүсе иптәштәребеҙҙең алдынғы эш тәжрибәләре менән уртаҡлашырбыҙ, етешһеҙлектәр тәнҡит ителәр» тип уйлағандарҙыр. Ләкин, үкенескә ҡаршы, йыйылыш көткәнде бирмәне. Партия группаһының ойоштороусыһы иптәш Богданов докладҡа алдан яҡшылап әҙерләнмәгән. Шуға күрә ул төп мәсьәләгә һис бер бәйләнеше булмаған нәмәләр тураһында 15 минут һөйләне, ә цех коммунистәренең эшенә бер нисә һүҙ менән генә туҡталды.

Һөйләһе һүҙҙәр, килтерәһе факттар, тәнҡитләһе етешһеҙлектәр күп ине. Цехта социалистик ярыш насар ойошторолған. Ҡайһы бер эшселәр, хатта коммунистарҙан Феоктистов һәм Крылов иптәштәр ҙә үҙ нормаларын үтәмәйҙәр. Ләкин докладсы уларға туҡталманы.

— Цехта социалистик ярыш ойоштороуҙа коммунистар нисек ҡатнашалар? — тип һораныйлар докладсынан.

— Йыйылышта ҡатнашыусылар уны яҡшы беләләр. Шуға күрә мин ул хаҡта туҡталып тормайым, — тип яуап бирҙе ул.

Йыйылышҡа 9 коммунистан бары бишеһе генә килеүе, унда тикшерелергә тейешле булған мәсьәләнең өҫтән-өҫтән генә ҡаралыуы — цех партия ойошмаһының производствоға етәкселектән ситтә тороуын асыҡ күрһәтте.

Цехта 8 кеше систематик рәүештә нормаһын 200 процентҡа үтәй. Ләкин уларҙың эш тәжрибәләре башҡаларға күсерелмәй. Эшселәр араһында политик тәрбиә эштәре алып барылмай. Йыйылышта сығыш яһаусы коммунистар ҙа был хаҡта һөйләмәнеләр. Коммунистарҙың производствола авангардлыҡ ролен күтәреү, цехтың эшен яҡшыртыу юлдары тураһында конкрет тәҡдимдәр индереүсе булманы. Шулай булғас, йыйылыш ингеҙле ҡарарҙар ҙа ҡабул итә алманы һәм кәрәкле һөҙөмтәләр ҙә бирмәне.

Ғ. Ибраһимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Политик мәктәп эшен тамамланы

Белорет ҡорос-сыбыҡ заводының беренсе көмөрлө цехы партия ойошмаһы эргәһендә ойошторолған политик мәктәп үҙенең эшен уңышлы тамамланы. Мәктәптә 26 коммунист уҡып сыҡты.

Мәктәптә уҡыу осоронда программанан тыш күп кенә доклад-тар, беседалар ойошторолдо.

М. Хәйҙәров.

Баҫыу станында политик-массовый эш

Йомағужа районы, Максим Горький исемендәге колхоз партия ойошмаһының агитколлективе яҙғы сәсеү осоронда планлы эш алып бара. Уның агитаторҙары баҫыу стандарында, трактор агрегатында систематик рәүештә беседалар үткәрәләр. Звено етәксеһе комсомолец-агитатор иптәш Кожаев сәсеүселәр һәм һөрөүселәр араһында әҙерлекле беседалар үткәрә, эштә лә шәхси өлгө күрһәтә. Сәсеү машинаһы менән 4,5 гектар сәсеү нормаһын ул көн һайын 6—7 гектарға еткереп үтәй. Уҡытыусы-агитаторҙарҙан Юрмича һәм Егошина иптәштәр алдынғыларҙың эш методтары тураһында һөйләйҙәр, айырым колхозсыларҙың, звено һәм бригадаларҙың көндәлек эш йомғаҡтарын күрһәтеп «боевой листок» һәм «молния-лар» сығаралар. Коммунист иптәш Круглова трактор агрегатында политик аңлатыу эштәре алып бара.

Юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, ордендар һәм медалдар менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы һәр бер колхозсыға аңлатылды. 1948—1949 йылдарҙа юғары урожай алыу өсөн наградлау шарттары күсереп яҙылып, колхоз правлениеһе бинаһында, баҫыу стандарында, трактор вагондарында элеп ҡуйылды. Хәҙер һәр бер кеше бригадирҙың, звеноводтың, трактористың, колхозсының, шулай уҡ ауыл хужалығындағы башҡа работниктарҙың нисәй күрһәткестәр өсөн наградланыуын яҡшы белә.

Колхозда көндәлек эшкә һөҙөмтә яһала һәм күрһәткес таҡтаһына яҙыла. Бында һәр бер колхозсы социалистик ярыш менән солғап алынған. Ярыш йомғаҡтары систематик рәүештә тикшерелә.

Партия-политик эште хужалыҡ бурыстары менән дөрөҫ яраштырып алып барыу арҡаһында Максим Горький исемендәге колхоздың партия ойошмаһы ирта культуралар сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп тамамлауҙы тәьмин итте.

Ф. Ғәлләмов.

Коммунистең урыны яҙғы сәсеүҙең хәл иткес участкаһында булырға тейеш

Саҡмағош районы колхоздары баҫыу эштәренең беренсе көндәренән үк ойошмағанлыҡ күрһәттеләр. Шул арҡала бында яҙғы сәсеү эштәре сиктән тыш аҡрын бара.

Райондың колхоздарында 760 коммунист иҫәпләнә. Был бик ҙур көс. Уны дөрөҫ урынлаштырғанда, һис шикһеҙ, яҙғы баҫыу эштәрен юғары сифатлы итеп ваҡытында үткәреүҙе тәьмин итергә булыр ине. Ләкин ВКП(б) райкомы һәм күп кенә тәүге партия ойошмалары яҙғы баҫыу эштәрендә коммунистарҙы иң мөһим участкаларға урынлаштырыуға иғтибар бирмәйенсә, был эштә серьез хаталарға юл ҡуйғандар.

Райондың колхоздарында ойошторолған 653 звенонан бары тик 47-һендә генә коммунистар звено етәкселәре булып эшләйҙәр. Коммунистарҙан 41 кеше бригадир, 41 кеше сәсеүсе һәм 30 кеше һабансы. Күп колхоздарҙа ер һөрөү, тырматыу кеүек мөһим эштәр йәш үҫмерҙәргә генә ышанып тапшырылған. Колхоз правлениелары был йәш үҫмерҙәрҙең эшенә һис бер төрлө контроль яһамайҙар.

«Боевик» колхозындағы 18 коммунистан ни бары алтыһы ғына баҫыуҙа эшләй. Ҡалғандары, ҡайһыһы идара эштәрендә, ә ҡайһы берҙәре бөтөнләй бер ергә лә эшләмәй. Мәҫәлән, Антонов — сельпо магазинында һатыусы, Андреев — завхоз, Сафронов — почта бүлеге начальнигы. Усманов — бухгалтер, Ведерников — клуб мөдире, Н. Антонов — учетчик, Романов — учетчик, Тихонов — ревизия комиссияһының председателе, Нагузин — баҙар директоры... Ә коммунист Яковлев колхоз эшендә бөтөнләй ҡатнашмай һәм ул 1948 йылда бер генә хеҙмәт көнө лә эшләмәгән. ВКП(б) члены Л. Архипов — 3,5 хеҙмәт көнө, Федотов — 11,5 хеҙмәт көнө генә эшләгән. Шуның менән бергә, ҡайһы бер коммунистар үҙҙәре колхоз производствоһында эшләмәүҙәре генә етмәгән, хатта үҙҙәренең семья члендарына ла колхозда эшләргә рөхсәт итмәйҙәр.

«Боевик» колхозындағы коммунистарҙың хеҙмәткә ҡарата бындай зарарлы мөнәсәбәттәренең сәбәбе, бөтәһенән элек, уларҙың ҡайһы берәүҙәренең үҙ хужалыҡтарын киңәйтеү, ауыл хужалығы артеле Уставын тупаҫ рәүештә боҙоу юлына баҫыуҙарында. Мәҫәлән, ВКП(б) члены сельпо һатыусыһы Антоновтың үҙ усадьбаһындағы ере 0,23 гектар булырға тейеш, ә ул уны, үҙ белдеге менән, 0,66 гектарға тиклем киңәйткән.

Бындай факттар башҡа ҡайһы бер колхоздарҙа ла урын алған.

ВКП(б)-ның Саҡмағош райкомы коммунистарҙы яҙғы баҫыу эштәренең мөһим участкаларына урынлаштырыуҙа булған бындай серьез етешһеҙлектәрҙе һәм хаталарҙы һис киҫекмәҫтән бөтөрөргә, сәсеү, һөрөү кеүек мөһим эштәрҙә коммунистарҙың үҙҙәренең эшләүҙәренә, яҙғы баҫыу эштәре планын ваҡытында үтәү өсөн көрәштең башында тороуҙарына өлгәшергә тейеш.

Ә. Камаев.

Советтар Союзында

Мәскәүҙең Сталин исемендәге автомобилдәр эшләү заводы май алды көндәрендә «ЗИС—150» маркалы яңы йөк автомобилдәре эшләп сығара башланы. Был «ЗИС — 150» маркалы йөк автомобиле дүрт тонна йөк йөрөтә.

ҺҮРӘТТӘ: Завод эшләп сығарған «ЗИС—150» маркалы беренсе йөк автомобиле.

В. Зунин фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Яңы урожай һуғыла башланы

Совет Төркмәнстанының райондары һуғарыла торған ерҙәргә сәселгән көҙгө арпаны йыйнай башланылар. Республика колхозсылары урожай йыйнауҙы ҡыҫҡа сроктарҙа һәм юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн ярышалар. Бакарден районының Калинин исемендәге һәм «Дайхан» колхоздары Төркмәнстанда беренсе булып, урожай йыйнауҙы тамамланылар. Көҙгө арпанан йөҙәрләгән бот урожай алынды. Урожай йыйнау 4 көн эсендә үткәрелде. Колхозсылар ашлыҡ һуға башланылар. Ашхабад районы Ворошилов исемендәге ауыл хужалығы артеле һәр бер гектарҙан 25-әр центнер арпа ала.

Колхоз фермалары өсөн миллионлаған коштар

РСФСР, Украина һәм Белоруссия ауыл хужалығы Министерстволарының инкубаторҙарында май айы уртаһына 40 миллионға яҡын тауыҡ йомортҡаһы һалынды. 11 миллион себеш сыҡты ла инде. Улар колхоз фермаларына, ҡошсылыҡ менән шөғөлләнеүсе эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә биреләде.

(ТАСС).

ЯҢЫ ҠУЛ

КРИНИЧКИ. (Днепропетровск өлкәһе). (ТАСС). Бөтә халыҡ ҡатнашлығында, Мокрая Сура йылғаһында, быуа төҙөлә. Был эштә райондың 20 колхозы ҡатнаша. Колхозсылар төҙөлөштө Октябрь революцияһының 31 йыллығына тамамларға йөкләмә алдылар. Бында майҙаны 304 гектар тәшкил иткән ҡул барлыҡҡа киләсәк. Унда 5 миллион кубометр һыу һаҡланасаҡ.

Грузияның боронғо һәйкәлдәрен һаҡлау

ТИБИЛИСИ. (ТАСС). Республиканың ҡалаларында һәм райондарында боронғо замандың күп һәйкәлдәре һаҡланғандар. Грузин ССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура эштәре управлениеһе был һәйкәлдәрҙе элекке хәленә килтереү эшен алып бара. X быуатта төҙөлгән Грузия архитектураһының гүзәл һәйкәлдәренең береһе тип һаналған, Цаленджих храмын аяҡҡа баҫтырыу, Мартвили һәм Икви соборҙарындағы иң боронғы живопись яҙмаларын реставрациялау эштәре ике йыл буйына дауам иткәндән һуң, тамамланды.

КОЛХОЗДАРҘА ЯЛ ЙОРТТАРЫ

АНДИЖАН. (ТАСС). Ленин районының «Сталинсы» колхозында гүзәл емеш баҡсаһында, ял йорто төҙөү эше башланды. Быны өсөн ауыл хужалығы артеле 50 мең һум аҡса бүлде. Бында ял итеүсе колхозсыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн библиотека, уҡыу залы, бильярд залы, һәр төрлө милли музыка ҡоралдары булдырыласаҡ.

Биш йыллыкты—дүрт йылда!

Завод маркаһының даны өсөн

«Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводы. Стәрлетамаҡ ҡалаһы». Ошолай тип яҙылған маркалағы станоктар илебеҙҙең күп предприятиеләрендә эшләйҙәр. Заводтың цехтарында үҫкән һәм квалификация алған меңдәрсә эшселәр ошо исем менән ғорурланалар. Яңы биш йыллыҡ аҙағына тиклем завод тағы ла ҙурайсаҡ һәм уның цехтарында тағы ла камиллаштерелгәнерәк станоктар етештерелеп сығарыласаҡ. Коллектив үҙ предприятиеһенең хәҙергеһе һәм киләсәге менән йәшәй, уны алдынғылар сафына сығарыу өсөн тырыша.

Шулай ҙа заводты алдынғылар сафына сығарыу өсөн тик теләк булыуы ғына етмәй. Ул теләкте реаль эш һәм бөтә работниктарҙең берҙәм хеҙмәт һалыуы менән ныҡытырға кәрәк. Заводтың күп работниктарында, бигерәк тә етәксе работниктарында тап бына ошо сифат етешмәй. Үткән йылда планда билдәләнгән станоктарҙы бирел етермәйенсә, заводтың илебеҙ алдында бурыслы булып ҡалыуы һәм быйыл да беренсе квартал заданиеның 93 процентҡа ғенә үтәлеүе шул турала һөйләй.

Эштә ритмлылыҡ булмауы пландарҙың үтәлмәүендә төп сәбәптәрҙең береһе булып тора. Ә ул, бөтәленән элек, цехтарҙы кәрәкле материал менән ваҡытында тәьмин итмәгәнлектән килеп сыға. Шуның арҡаһында ҡойоу цехы үткән кварталдың бер айында ғына ун көн эшләмәй торҙо. Сөнки ул суйын һәм ҡом менән тәьмин ителмәне. Ә механик цехтар ҡойолмаларҙың килеүен көттеләр һәм килгәндәренең дә күбеһе брак булды. Уның өҫтәүенә иптәш Анферов етәкселек иткән цехта киҫеү һәм үлсәү инструменттәре булманы. Өсөнсө һәм бишенсе номерле механик цехтар ҙа шундай ҡыйынлыҡтарҙы кисерҙеләр. Ә слесарь-йыйнау цехы станоктарҙы аҙлап ҡына бирелгән, ләкин эшкәртеүҙән сығып һыуынып та етмәгән деталдәрҙән йыйнарға мәжбүр булды. Бындай деталдәрҙән йыйылған станоктарҙың сифаты яҡшы булыуы ҙур шик аҫтында ҡала һәм завод станоктарын алыусы предприятиеләр уларҙың сифаты түбән булыуы тураһында хәбәр итәләр.

Заводтың иптәш Горкунов етәкселек иткән техник-тәьминәт бүлеге цехтарҙы тейешле материал һәм инструмент менән тәьмин итеү эшенә яуаплыһыҙ ҡарауы механик цехтарҙы уҡар көн, ә слесарь-йыйнау цехын ике аҙна буйына эшләмәй ултырыуға килтерҙе. Директор иптәш Сулаков техник-тәьминәт бүлеге работниктәренең борола алмаусылыҡ күрһәтеүҙәренә иш өсөндәр килешеп ҡарай.

Цехтарҙа производствоны, технологик процесте дөрөҫ ойоштороуҙа, хеҙмәттең яңы методтарын индереүҙә, станоктарҙы камиллаштереүҙә инженерҙәр, техниктәр ҙур роль уйнарға тейеш иҫеләр. Ләкин улар тейешле инициатива күрһәтмәйҙәр. Күпселек специалистар завод управлениеһенең, бүлектәрҙең канцелярияһына тупланғандар. Туранан-тура производствоға ингән специалистар бик аҙ. Технолог Александр Иванов, мастер Николай Российский иптәштәрҙең гүзәл эш тәжрибәләре производствоға индерелмәүе, индерелгән 76 рационализация тәҡдимдәренең күбеһе тормошҡа ашырылмауы заводтың инженер-техник работниктәре производствонан ситтә тороуҙары тураһында һөйләй. Әгәр баш конструктор Докшицкий, баш технолог Кокшокин һәм баш металлург Стрельченко иптәштәр яңылыҡтарҙы күрә белһәләр, уның ойоштороусы булһалар бындай хәлдәр булмаҫ ине. Ә бракты бөтөрөү, деталдәрҙе эшләүҙе, сығарылған станоктарҙы камиллаштереү юлдарын табыу, завод маркаһының даны өсөн көрәште ойоштороу уларҙың төп бурысы булырға тейеш.

Завод етәкселәре пландың үтәлмәүен, брак булыуын эшсе кадрҙар, бигерәк тә квалификациялы эшселәр етешмәүенә һылтайҙар. Дөрөҫ, заводта электән эшләгән кадровый эшселәр күп түгел. Ләкин эшсе көсө етерлек. Ә инструменталь һәм дүртенсе механик цехтар эшсе көс менән кәрәгенән артыҡ тәьмин ителгәндәр. Эш процесендә яҡшы квалификация алған, күп профессияға эйә булған йәш стахановсылар ҙа аҙ түгел. Бер нисә профессияға эйә булған стахановсы токарҙәр Владимир Горин, Анатолий Винокуров, Хасанова, Абакумова, Морозов, строгальщик Әлхәмов, расточник Шарков, комсомолец-йәштәр бригадаһы бригадире Бабиков һәм тиҫтәләгән башҡа эшселәр заводтың маҡтаулы кешеләре. Эшселәрҙе уҡытыу, тәрбиәләү эшен юлға һалғанда, уларҙың хеҙмәтен яҡшы ойоштороғанда, эш, инструмент, материал менән ваҡытында тәьмин иткәндә алдынғылар һаны, һис шикһеҙ, күп булыр ине. Ә заводта цех начальниктәре һәм мастерҙар ҙа, технолог һәм нормировщиктар ҙа, эшселәр һәм башҡа работниктар ҙа үҙҙәренең белем, квалификация кимәлдәрен күтәреүҙе теләйҙәр. Завод етәкселәре был категориялағы эшселәрҙе уҡытыуға айырыуса иғтибар юнәлтергә тейештәр. Сөнки улар заводтың планды үтәүендә, завод маркаһының даны өсөн көрәштә хәл иткес көс булып торалар.

Ленин исемендәге станоктар төҙөү заводының быйыл үҙ эшен яҡшыртыуға мөмкинлеге бар. Коллектив Тыуған ил алдында бурыслы булып ҡалырға теләмәй һәм заводты алдынғылар сафына сығарыу өсөн бөтә көсөн һалырға әҙер. Завод етәкселәренең бурысы — коллективтең теләген тормошҡа ашырыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе хәрәкәткә килтереүҙән тора.

Л. Гомберг.

Өфө электр оборудованиеләре заводының алдынғы стахановсыһы, ҡала Советы депутаты, токарь В. А. Клементьев биш йыллыҡ норма үтәне. Ул хәҙер 1951 йыл иҫәбенә эшләй. Дүрт тапҡыр почет грамотаһы менән наградланған. Апрель айында нормаһын 398 процентҡа үтәп, ул ике мең дүрт йөҙ һум хеҙмәт хаҡы эшләп алды.

Һүрәттә: иптәш В. А. Клементьев эш өҫтөндә.

В. Жданов фотоһы.

Йәш нефтселәр

ОКТЯБРЬСК. Ҡаланың нефть сығарыу һәм бораулау предприятиеләрендә эшләүсе эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәрҙең 50 проценте самаһы комсомолец-йәштәрҙән тора. Нефтсе йәштәрҙең был ҙур коллективе бер теләк менән—нефть биш йыллығын дүрт йылда үтәү теләге менән йәшәй. Йәш нефтселәр комсомолдың 30 йыллығы хөрмәтенә пландан тыш меңдәрсә тонна нефть бирергә йөкләмә алғайнылар. Ҡаланың нефть предприятиеләрендә ойошторолған утыҙҙан артыҡ комсомолец-йәштәр бригадалары нефть биш йыллығын дүрт йылда үтәү өсөн көрәшеп, заданиеләрҙе систематик рәүештә арттырып үтәп киләләр.

Беренсе номерле промыселдең комсомолец-йәштәре инициативаһы менән нефть тоткостар төҙәлде. Улар ярҙамында йәштәр, түгелеп ятҡан 600 тонна нефтте йыйнап алдылар.

Беренсе номерле бораулау конторыһында маҡтаулы мастер, Ленин орденле комсомолец Филипп Алексеев иптәш етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы ҡаланың иң яҡшы стахановсы бригадаһы булып иҫәпләнә. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, оборудованиеләрҙе ваҡытында ремонтлау һәм яҡшы тәрбиәләү арҡаһында бригада март айында бораулау планын 111, апрелдә 233,4, ә майҙың 9 көнө эсендә 205 процентҡа үтәне. План буйынса 435 метр урынына, был бригада бер станок-айға 705 метр проходка биреп килә.

Икенсе номерле промыселдә төҙөлгән комсомолец-йәштәр бригадалары апрель айында 41.000 һум экономия бирҙеләр. Был бригадалар һуңғы ике ай эсендә генә Тыуған илебеҙгә пландан тыш йөҙҙәрсә тонна нефть сығарыуға өлгәштеләр.

«Туймазынефть» тресының Ленин ордене менән, нефтселәрҙең ҙур группаһы ордендар һәм медалдәр менән наградланыуы комсомолец-йәштәр араһында көслө производство күтәрелеше тыуҙырҙы.

А. Ашин,

ВЛКСМ-дың Октябрьск ҡала комитете секретаре.

Хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫә

Өфөнөң Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре фабрикаһында һуңғы айҙарҙа хеҙмәт етештереүсәнлеге байтаҡ юғары күтәрелде. Быны производство пландарының үтәлешенән үк күреп була. Әгәр март айында производство планы үтәлеше 104 процент тәшкил иткән булһа, апрель айында ул 114,3 процентҡа үтәлде. Шул уҡ ваҡытта продукцияның сифаты ла күтәрелле.

Начальниге иптәш Ланг булған тегеү цехы айырыуса яҡшы эшләне. Цех апрель планын 20 көн эсендә тамамлағайны. Был коллективҡа заводтың күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. Стахановсыларҙан Баташов, Егоров иптәштәр беренсе майға 7,5-әр айлыҡ норма үтәнеләр. Егоров яңы тегеү машинаһын үҙләштереп, ай һайын ике ярым-өс норма бирә.

Р. Сафин.

Специалист кәңәштәре

Тарынан юғары урожай алыу юлдары

Тары — агротехник сараларҙы дөрөҫ ҡулланғанда юғары урожай бирә торған культура. Уның өсөн иң яҡшы ерҙәр булып [illegible] һанала. [illegible]

Тары орлоғон сәсеүгә әҙерләү ҙур иғтибар итеүҙе талап итә. Ул ваҡ бөртөклө культура. Был бөртөктәр шулай уҡ ваҡ бөртөклө ҡырлыҡ һәм үлән орлоҡтары менән тиҙ ҡатнашалар. Бындай ҡатнаш орлоҡтарҙы таҙартмайынса сәсеү ярамай. Иң яҡшыһы — орлоҡто ҡул менән таҙартыу. Бер кеше көнөнә 6—7 килограмм орлоҡ таҙарта ала. Тарының сәсеү нормаһы бәләкәй булғанға күрә, орлоҡто ҡул менән таҙартыу ауыр эш түгел.

[illegible] ауырыуҙар тары культураһында бик йыш осрай. Ҡайһы бер йылдарҙа сәсеүлектең 70—80 проценте ошо ауырыу менән һәләк була. [illegible] Бының өсөн 10 литр тағы һыуға 36 грамм 40-процентле формалин ҡушыла. [illegible] тары орлоғо батырыла һәм 2 минут самаһы тотола. [illegible]

Формалин менән ағыуланған орлоҡҡа [illegible]

Тары орлоғон яровизациялап сәсергә ҡарак. [illegible] Беренсеһендә—100 килограмм орлоҡҡа [illegible] литр, ә икенсеһендә—10 литр тағы һыу алына. [illegible] 18—20 градус [illegible] үрында 7—10 көн яровизацияланған.

[illegible]

Тары һис сәселә торған культура булыуға ҡарамаҫтан, уның өсөн ерҙе иртә эшкәртергә ҡарак. [illegible] ваҡытына тиклем бер нисә тапҡыр культивацияланған. Сәскән саҡта тупраҡтың өҫкө ҡатламы [illegible]. Тары тупраҡ йылынып 12—15 градус булғас ҡына сәселә. Башҡортостан шарттарында уны 20—25 май көндәрендә сәсеү яҡшы.

Сәсеү юлдарына ла иғтибар ителәргә тейеш. Иң яҡшыһы — киң рәтле итеп сәсеү. [illegible] Былай эшләгәндә күрше рәттәрҙең аралары 15 сантиметр, ә таҫма аралары 45 сантиметр ҡалдырыла. Әгәр ҙә рәт аралары ҡул менән эшкәртелә ҡалһа, рәт аралары 30-ар сантиметр ҡалдырыла.

Сәсеү ысулына һәм срогына ҡарап тарының сәсеү нормаһын үҙгәртергә мөмкин. Киң рәтле итеп сәскәндә һәр гектарға 14—16 килограмм, ә рәт аралығын киң ҡалдырмайынса тотош итеп сәскәндә, 18—20 килограмм тары орлоғо талап ителә. Был нормаларҙы ҡулланыу өсөн, әлбиттә, орлоҡтоң сығышы нормаль булырға тейеш.

Тары — тәрбиәләүҙе яратыусы культура. [illegible]

Шулай уҡ тары өҫтәмә ашламалар индереүҙе ярата. [illegible] Ҡулланыу өсөн ашламалар түбәндәгесә әҙерләнәләр: бер силәк тиреҫ шыыҡсаһына 4—5 силәк саф һыу ҡушыла, [illegible]

Партия һәм хөкүмәт тары культураһы үҫтереүгә ҙур иғтибар итәләр. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарында тарының урожайын күтәреү буйынса ҙур бурыстар ҡуйылды. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн бөтә тары культураһын звеноларға беркетергә һәм уларҙа бөтә агротехник сараларҙың тулыһынса үтәлеүен тәьмин итергә ҡарак.

Ғ. Ашкрумов.

Биология фәндәре кандидаты.

Фельетон

„Үлек килограмдар"

Заготскот ҡапҡаны алдында нәүбәт көтә, тапшырырға килтергән быҙауҙарҙы, һарыҡ һәм [illegible]

— Тиҙ асылаһы инде ҡапҡаһы!

— [illegible]

[illegible] Вавилов [illegible]

— Бик күп була, әбекәй. Һине алдамаҫҡа инде була. Бар, [illegible]

[illegible] 23 килограмм [illegible]

— Ике бот та түгелме? [illegible]

[illegible]

«Үлек килограмдар» [illegible]

Баймаҡ районының етәкселәре Вавиловтың был «комбинацияларын» белеп торалар ҙа уның менән ҡыҙыҡһынмайҙар.

Е. Бик.

Бригадир Ғәйнислам Әюпов

Ҡырҡ өсөнсө йылдың август айы ине. Старая Русса янында барған һөжүм ваҡытында танк минаға эләгеп, гусеницаһы өҙәлдө һәм нейтраль зонала туҡтап ҡалды. Танкынан һикһән-йөҙ метр ғына алыҫлыҡта торған немецтәр бөтә ут көстәрен шул урынға юнәлттеләр. Улар танкының экипажына ул урынды ташлап китергә мәжбүр итергә, танкыны үҙ ҡулдарына төшерергә иҫәп тоталар ине. Ләкин танкист үҙ машинаһын дошманға ҡалдырып китергә теләмәне. Бер төн төҙәтте, ике төн төҙәтте. Ә өсөнсө төндә танк яңынан ҡуҙғалып китте, ут һыҙығын аша һикереп сыҡты ла, дошман өҫтөнә ябырылды. Ут аҫтында үткән өс төндең тарихе булып танкистең күкрәгендә Ҡыҙыл Йондоҙ ордене балҡып янды...

Ҡыҙыл Йондоҙ орденле элекке танкист һәм Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле бөгөнгө бригадир Ғәйнислам Әюпов һуғыштан ҡайтҡас та, үҙе кеүек башҡа фронтовиктар менән, тыныс хеҙмәт фронтына ҡушылды. Красин исемендәге колхозда тракторист булып бер сезон эшләгәндән һуң, «Бик-ҡарамалы» колхозсылары уны үҙ колхоздарына ҡайтарып алдылар һәм ул, 1947 йылдың март айынан башлап, 65 кешенән торған бригада менән етәкселекте үҙ өҫтөнә алды.

Бригадир — колхозда командир. Ғәйнислам был һүҙҙең мәғәнәһен бик яҡшы аңлай ине һәм алда торған яуаплы бурыстарҙы хәл итеүҙә ул үҙенең бөтә энергияһы ла мәсьәләләргә таянды. Колхоз башлығына юғары урожай алыу өсөн үгә бөтәһенән элек бригаданың бығаса башҡарып килгән эш методтарын яңы шарттар нигеҙендә килеп тыуған яңы һорауҙарға лайыҡлы итереп ҡайтанан ҡорорға, звено системаһын үҙләштерергә тура килде. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары уларҙы фидакәр хеҙмәткә рухландырҙы. Юғары урожай звеноһы члендәре бойҙайҙың гектарынан 20-шәр, арыштан — 22-шәр центнер урожай алырға тигән йөкләмә ҡабул иттеләр. Был колхоз крәҫтиәндәренең һөйөклө Ватанға, даһи Сталинға биргән анттары ине.

Ант һәм вәғәҙә эштән айырылманы. Бригада баҫыуҙарында алдылыҡтар гөрләп үҫтеләр. Был тырыш һәм намыҫлы хеҙмәттең емеше, колхоз ауылының бәхете, Тыуған ил күәтенең сағылышы ине. Мул урожайҙың бер бөртөгө лә ерҙә ятып ҡалманы, һәҙемтә көткәндән күп яҡшы һәм еҫтән булып сыҡты. Ғәйнислам етәкселек иткән бригада, звено члендәре һәр гектар ерҙән уртаса 20—22-шәр центнер урожай йыйнап алдылар. Иген өсөн көрәш фронтында тыуған батырлыҡ, фидакәр хеҙмәт бригада һәм звено члендәренең күкрәктәрен ордендәр, медалдәр менән биҙәне. Апрель айының ҡояшлы иртәһе Дәүләкән районының башҡа колхоздары кеүек үк, «Бик-ҡарамалы» игенселәренә лә шатлыҡлы хәбәр алып килде. Колхоздың хөкүмәт ордендәре һәм медалдәре менән наградланған 18 кешеһенең 8-е Ғәйнислам Әюпов бригадаһының игенселәре ине. Үткән йылда бишәр йөҙ хеҙмәт көнө эшләгән Ипгаев Хәмит, Хаматова Мәкнур, Дәүләтов Рәсим һәм башҡаларҙың исемдәре ҙур маҡтауға лайыҡ булдылар. Улар звено буйынса өҫтәмә хеҙмәт көндәре менән бергә 12—15-шәр центнер игеп алдылар.

Награда уларҙы яңы еңеүҙәргә дәртләндерҙе. Улар быйыл баҫыуҙарҙан үткән йылға ҡарағанда тағы ла мулыраҡ урожай алыу өсөн берҙәм походҡа сыҡтылар. Бригада баҫыуҙарындағы 45 гектар бойҙай һәм 45 гектар арыш ерҙәре кәрәкле ашламалар менән үҙ ваҡытында аҙыҡландырылдылар. Үткән йыл юғары урожай участкаһында һәр бер гектар ергә 2-шәр центнер аммиак селитраһы менән аҙыҡландырыу яҡшы һөҙөмтәләргә килтерҙе. Бригадир Әюпов үткән йылдың тәжрибәләренән сығып, был сараны быйыл тағы ла киңерәк күләмдә һәм ҡыйыуыраҡ ҡулланырға тотондо. Улар быйыл һәр гектарҙан уртаса 20-шәр центнер бойҙай һәм арыш урожайы алыу өсөн көрәшәләр. Бригада үткән йылғы 163 гектар урынына быйыл 196 гектар ашлыҡ сәсә. Сәсеү майҙанының йыл һайын киңәйә барыуы һәм гектарҙарҙың урожай биреү кимәленең күтәрелеше кешеләрҙең, уларҙың патриотик хеҙмәттәренә, берҙәм һәм ныҡлы дисциплиналы булыуҙарына бәйләнгән. Улар бригадир йәки звеноводтарҙың эшкә әйтеүсе көтөп ятырға ғәҙәтләнмәгәндәр. Ҡарттар әйтмешләй: «эшкә ҡояштан алда тороп китергә, кисен ҡояштан һуңға ҡалырға, эште ай яҡтыһы менән дауам итергә» өйрәнгәндәр. Бына шулай эшләнеләр улар үткән йыл колхоз баҫыуҙарында.

Ер бай һәм йомарт ул. Ләкин ер үҙенең байлығын бушҡа бирмәй. Уны тырыш хеҙмәт, аҡыл, фән көсө менән даулап алалар. Бригадир Әюповтың ер тураһындағы уйҙары шуны дөрөҫләйҙәр. Бер көндө ул тракторист Носопов ярҙырып үткән сиҙәмде буйҙан-буйға үлсәп килеп сыҡты ла, тракторҙан күҙен алмай оҙаҡ ваҡыт ҡарап торҙо, һәм ғорур тауыш менән:

— Ер шәп, мул урожай вәғәҙә итә. Тик бөтә көсөңдө, белемеңде һалып эшләргә, иренмәҫкә кәрәк,— тине.

Мин уның ошо беҙ баҫып торған ер тураһындағы фекерҙәрен тағы ла нығыраҡ асыҡлау маҡсаты менән:

— Шәпме, әллә яҡшымы? —тигән һорау биргәс, ул:

— Яҡшы, бик яҡшы,—тип дауам иттерҙе,—сөнки мин был ерҙе үтәнән-үтә күреп торам. Был ерҙе мин бынан теүәл 12 йыл элек беренсе тапҡыр трактор менән һөрөп бойҙай сәскәйнем. Ә бына теүәл 12 йылдан һуң шул ергә тағы ла әйләнеп ҡайттыҡ. Шәп урожай бирәсәк. Ә киләһе йылға тағы ла яҡшы буласаҡ.

Һәм ул ҡояш йылыһында парланып ятҡан кәҫтәрҙе ҡулындағы метр таяғы менән төртөп күрһәтте:

— Дөрөҫ, был балсыҡтар хәҙергә бик ҡатылар. Тағы ла бер йылдан улар ваҡланып бөтәләр. Кәҫтәре серей, ерҙә аҙыҡ мул була. Ә уның өсөн эште еренә еткереп эшләргә кәрәк. Ер яҡшы эшләүҙе ярата, уныһын онотма. Ләкин был һөрөү мин теләгәнсә барып сыҡмай әле. Һабандарға предплужник ҡуйырға кәрәк. Ул сағында ерҙең өҫкө ҡатламы бураҙна төбөнә һалына, үҫемлек ҡалдыҡтары унда серейҙәр, ашламаға әүерелеләр, ә өҫкә яҡшы тупраҡ күтәрелә. Ул сағында инде ерҙән урожай алып була, ергә үпкәләргә бер кемдең дә хаҡы юҡ...

Һүҙгә һаран, баҫынҡы тәбиғәтле бригадирҙең ер тураһындағы ошо фекерҙәрендә хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәт, партия һәм Ватан алдында намыҫлы һәм саф йөрәктән тоғролоҡ тойғоһо янғырай.

М. Тажи.

Дәүләкән районы «Бик-ҡарамалы» колхозы.

Халык-ара күҙәтеү

Палестиналағы вакиғалар көтелмәгән хәл түгел. Бөтә донъяның демократик общественносе күптән үк инде англо-американдарҙың манёврҙарын һәм уларҙың халыкты башкаран һәм итеүҙәрен тынысһыҙлык менән күҙәтеп килде. Палестинаға Британия мандатының срогы 1948 йылдың 15 майында тулды. Быны шуға күрә лә, Англия Яҡын Көнсығышта үҙенең позицияларын һаҡлап ҡалыр өсөн шындай үҙ булһа икенсе форма табырға тырышты. Инглиздарҙың Палестина күрше Трансиорданияла булыуын рәүештә инглиздарҙың уларҙың Палестинанан «китеүгә» юнәлтелгән әҙерлек алымдарының береһе булып торҙо. Был «карар юл» менән инглиздәр үҙҙәренең әленке әйһәнә — Палестинаға кире ҡайтырға һуң тоталар ҙа.

Американлылар килгәндә иһә, улар, Англия позицияларының дөйөм көсһеҙләнеүенән файҙаланып, әгәр ҙә Палестинала инглиздар урынын алмаған хәлдә лә, уларҙы ҡыҫырыҡларға теләрҙәр ине. Бында Кушма Штаттарҙың нефть интерестәре буйынса (Алыҫ Көнсығыш нефте Палестина аша сығыла), шулай уҡ стратегик интерестәре лә ҙур ролде уйнамай ҙа.

Ошондай хәлдәрҙә Англия, Палестинаның Берләшкән милләттәр ойошмаһы кулына тапшырырға үҙенең әҙер икәнлеген белдереп, «мәрхәмәтле» ишара яһаны.

Палестина мәсьәләһе Берләшкән милләттәр ойошмаһында күп айҙар буйынса тикшерелде. Генераль Ассамблеяның үткән йылғы ноябрь сессияһында Палестинаны ике государствоға — еврей һәм ғәрәп государстволарына бүлеү тураһында күпселек тауыш менән ҡарар ҡабул ителгәйне. Был ҡарарҙы Советтар Союзы ла якланы. Палестинаны бүлеү өсөн АҠШ-та тауыш бирҙе, ләкин, артабанғы вакиғаларҙан күренгәнсә, был тик уның манёвре генә булды.

Мәсьәләне асыҡлау өсөн оҙаҡ вакыт үтмәне. 19 мартта Америка хөкүмәте Палестина өҫтөнән Берләшкән милләттәр ойошмаһының опекаһын булдырыу тураһында тәҡдим менән сыҡты һәм был тәҡдимен ундағы халыкты тынысландырыу кәрәклеге менән нигеҙләне. Ләкин Генераль Ассамблеяның АҠШ инициативаһы менән саҡырылған махсус сессияһында Америка делегацияһы опека тураһындағы резолюция нигеҙен, уның ҡабул ителеүен әлегә алманы.

Американың үҙенең политик, экономик һәм хәрби-стратегик фекерҙәре файҙаһына Палестинала асыҡтан-асыҡ ярым колониаль режим урынлаштырыу планы күп илдәрҙә тулыһынса нигеҙле ҡаршылыҡҡа осраны.

Ә шул уҡ вакытта вакиғалар үҫкәндән-үҫә барҙы. Еврейҙәр менән ғәрәптәр араһындағы мөнәсәбәттәрҙә киҫкенләшеү артты. Англия мандатының срогы тамамланыу алдынан еврей общинаһы еврей государствоһы Израилдең төҙөлөүен иғлан итте.

Иҫкәне, Палестинаның мотлак «китерге» уйлап, Англия үҙ ҡоралдары менән ҡоралланған һәм Англия офицерҙәре тарафынан етәкселек ителгән «ғәрәп легиондарын» еврейҙәргә ҡаршы һөжүмгә күтәрҙе. 15 майға ҡаршы төнлә, Израиль государствоһы иғлан ителгәс уҡ, Ливан, Сирия, Трансиордания, Ирак, Египет ғәскәрҙәре Палестинаға индерҙе. Билдәле, был илдәр үҙ хужаларының теләгенән башҡа бындай аҙым яһай алмаҫтар ине. Бигерәк тә Трансиордания быны эшләй алмаҫ ине, сөнки ул Англия менән төҙөлгән хәрби договор буйынса, хатта, Англияның рөхсәтенән башҡа, бер ниндәй хәрәкәттәр башҡарырға ла хоҡуклы түгел.

19 майҙа Англия сит ил эштәре министрлығы вәкиле айырыуса һалҡын ҡанлылык менән түбәндәгеләрҙе белдерҙе: «Англия Трансиорданияға һәм Англия менән союздаш булған башҡа государстволарға ярҙам күрһәтергә һәм уларҙың ҡораллы көстәрен ҡорал менән тәьмин итергә йөкләмә алды. Берләшкән милләттәр ойошмаһы ғәрәп государстволарының законһыҙ акттар яһағанлығын билдәләгәнгә тиклем, Англия хөкүмәте договор йөкләмәләренән кире сигеүгә нигеҙлек күрмәй».

Шулай уҡ Америка делегаты ла Имиселек Советында үҙен тыныс тотто. Ул Палестинаның вакиғалары «тынысһыҙ бөрөу» буйынса тора, тип ҡырҡа рәүештә билдәләүсе резолюция индерҙе, ләкин бынан һуң ике көн буйына ул хатта үҙенең резолюцияһын ҡарау тураһындағы мәсьәләне күтәрмәне лә, һәм Имиселек Советы икенсе дәрәжәлеге мәсьәләләр менән шөғөлләнде.

Был политик уйын демократик общественносте ғәжәпләнеү тыуҙырҙы. Шуның менән бергә, бөтә алдынғы матбуғат Англо-Саксондарҙың ике йөҙле политикаһын Советтар Союзының тынычлык һөйөүсе политикаһына ҡапма-ҡаршы ҡуя. Советтар Союзы вәкиле Имиселек Советында Палестинала бөтөн хәрәкәттәрҙе туктатыуға ҡарата, ашығыс саралар күреүҙе талап итә.

* * *

Англия лейбористар партияһының һәр йыл һайын Скарборола үткәрелә торған йыйылыш 47-се конференцияһы ағымдағы аҙнаның иҫтәлекле вакиғаһы булды.

Уң лейбористар лидерҙәренең тәнкитте басып ҡалдырырға тырышыуҙарына ҡарамаҫтан, конференцияла етәксе партияның күп кенә комиссиялары асылды. Делегаттарҙың сығыштары лейборист партияһындағы серьез фекер айырымлыктары барлығын күрһәтте. Был фекер айырымлыктары 1945 йылдан бирле лейбористарҙың власка килергә ярҙам иткән эске һәм тышҡы политика өлкәһендәге вәғәҙәләрен боҙоуҙан килеп сыҡтылар.

Һуңғы йылда лейбористар партияһының шаналыулы члендәренең [illegible] характере булып тора.

Урындағы күп кенә етәксе работниктар партиянан киттеләр. Лейбористар партияһының Кэллен (Лондон) ойошмаһы секретаре, күптән түгел партиянан сыҡҡан, Джеймс Соллиҙен белдереүе тыңлап булып тора: «Беҙ лидерҙәребеҙҙең консерваторҙар һәм уларҙың политикаһы менән шул тиклем тығыҙ бәйләнгәнлектәрен күрәбеҙ. Лидерҙәребеҙ «социалистик хөкүмәт һәм консерваторҙар оппозицияһы» тип нигеҙләп белдерҙе».

Лейбористарҙың эске политикаһы ла бынан прогрессивлек түгел. Англия экономик төшкөлөктән киҫкен һәм торған һайын АҠШ-ка ныҡыраҡ бойондороклолокка элгә бара.

Лейбористарҙың «демократик социализм» тип атала торған мәнзәре Англия хезмәтсәндәренең йәшәү кимәлен артабан түбәнәйтеүгә килтерелеп төҙөлә. Хезмәт хаҡы күтәрелмәй, ә хаҡтар һаман һәр рәүештә арта бара. Бының менән бер рәттән капиталистарҙың табыштары үҫә. Һуңғы ике йыл эсендә был табыштар 32 процентҡа үҫте һәм хәҙер илдән милли доходының өстән бер өлөшөн тәшкил итә.

Вәғәҙә ителгән национализация планы, билдәле булғанынса, практикала банк (ул элек тә хөкүмәт ҡулында ине) һәм күмер промышленносе менән сикләнде. Ошо «национализация» нәтиҙәһендә күмер промышленносе хужалары халыҡ мәсьәләһе нигеҙендә 165 миллион фунт стерлинг сумлыҡ компенсация алдылар.

Лейбористар партияһы лидерҙәренең конференцияла яһаған сығыштары оҫҡан арты кредиторҙарҙың тарафынан гәйепләнгән национализация политикаһының артабан үҫмәйәсәген күрһәтте. Әгәр ҙә лейбористар парламентта буласаҡ һайлауҙарҙа еңһәләр, тип белдерҙе Моррисон, был саҡта улар «промышленностең яңы тармаҡтарына национализация үткәреүгә ҡарағанда ла, национализацияланған предприятиеләр эшенә үҙҙәренең эштәрен күберәк арнаясаҡтар».

Билдәле булғанынса, һуңғы вакытта лейбористар етәкселеге политикаһынан дөйөм ризаһыҙлыҡ парламенттағы лейбористарҙың «артҡы скамьяла ултырыусыларының» активлашыуында күренде.

Конференцияла уң лидерҙәр партияның һул, прогрессив элементтәренә ҡаршы сыҡтылар. Башҡарма комитеттең баҫымы аҫтында, айырым алғанда, Италия социалистәре лидере Неннига ҡотлау телеграммаһына ҡул ҡуйғаны өсөн күптән түгел партиянан сығарылған парламент члены Плэтте-Миллскә сығыш яһарға рөхсәт итеү тураһындағы тәҡдим кире ҡағылды. Шулай уҡ Плэтте-Миллсте тыңлау өсөн булған тәҡдимгә 1.403 мең кеше тауыш бирҙе.

Конференцияла барған дискуссия партия эсендәге һәм тышҡы политика өлкәһендәге серьез фекер айырымлыктарын асып һалды.

Зиллиакус үҙенең телмәрендә, күп делегаттарҙың хуплау тауыштары аҫтында, Бевиндең тышҡы политикаһы «Черчилль һәм Иден тышҡы политикаһының дауамы булып тора», тип белдерҙе. «Черчилль, Иден һәм консерватив партия был фактты күп тапҡырҙар раҫланылар».

Зиллиакустың резолюцияһын яҡлап, партияның Спелторн районы ойошмаһы председателе Том Гиттинс Англия тышҡы политикаһының башҡа характерле чертаһын — «АҠШ государство департаментенә бойһонғанлығын һәм тыңлаусанлығын һәм, икенсе яҡтан, Советтар Союзына һәм Көнсығыш Европа государстволарына һалҡын ҡанлы асыу тотҡанлығын» билдәләне.

Скарборолағы лейбористар конференцияһы, Англия общественносенең киң ҡруғтарында уң «социалистар» политикаһынан ризаһыҙлыҡтың артҡанлығын, ә прогрессив элементтәр позицияларының аҡрынлап нығығанлығын күрһәтте.

* * *

«Европаның экономик хеҙмәттәшлек Советы» тип атала торған советтағы Америка вәкиле Гарриман үҙҙән аҙнала Лондонда пресс-конференция яһаны. Был конференцияла ул «Маршалл планының» ҡайһы бер мөһим шарттары тураһында хәтергә төшөрҙе.

Айырым алғанда, тиңе ул, Англия менән стерлинг блогының башҡа илдәре араһындағы мөнәсәбәт тураһындағы мәсьәлә «Маршалл планының» фекере буйынса Вашингтонда экономик хеҙмәттәшлек управлениеһе тарафынан хәл ителергә тейеш. Шуның менән бергә, Гарриман, 16 ил һәм Америка хөкүмәте араһында төҙөлергә тейеш булған ике яҡлы пакттар, әгәр ҙә валютаның халыҡ-ара фонды валютаны ысын хаҡы менән баһаланмай тип тапһа, был илдәрҙә валюта девальвацияһын күҙҙә тотасаҡтар, тип асыҡ билдәләне.

«Халыҡ-ара валюта һәм финанс мәсьәләләре буйынса милли консультатив советтең» докладында Көнбайыш Европаның 16 ил валютаһын долларға буйһондороуға ҡарата АҠШ-тың ошо уйҙарына өҫтәмә яҡтылыҡ һипте. Был докладты Трумэн 17 майҙа Америка конгрессына тапшырҙы.

Докладта «яҡын киләсәктә, ихтимал, ҡайһы бер төҙәтмәләрҙе һәм валюта курстарын индерергә тура килер» тип туранан-тура әйтелә.

Докладта, экономик совет фекере буйынса, илдең валюта курсы уның теүәл һәләтлегенә ярашлы булмаған ваҡиғаларҙа, был илдең валюта курсын тейешле рәүештә регулировать итеүҙе талап итәсәктәр, тип күҙҙә тотола.

Докладҡа комментарийҙар биреп, Ассошиэйтед Пресстең Вашингтондағы хәбәрсеһе, «АҠШ был ваҡиғаларҙа Маршалл планы буйынса ярҙам алыусы илдән ни кәмендә валюта фонды менән берлектә девальвация планын талап итәсәк» тигән һөҙөмтәгә килә. Әгәр ҙә был ил бынан баш тартһа, уны Маршалл планы буйынса ҡаралған средстволарҙан мәхрүм итеү менән ҡурҡытыла. Официаль сығанаҡтарға һылтанып, хәбәрсе быныҡ Англияның стерлингтар фондында ла ҡағылыуы мөмкин, тип белдерҙе.

Англияның финанс ҡруғтары, күрәһең, был курстың әҙемталәрен күҙ алдарына асыҡ килтерәләр. Мәҫәлән, «Файненшл Таймс» газетаһы, был темаға ҡағылып, былай тип яҙа: «АҠШ-тың, Англияның экономик политикаһын һәм уның диңгеҙ арты сауҙаһын, башҡа илдең эшенә тығылыу булырлыҡ масштабтарҙа үҙ контроле аҫтына алыу ҡотҡоһона бирелеүе ихтимал...»

Бында һүҙ бөйөк держава тураһында бара. «Маршалл планына» ҡатнашыусы көсһеҙерәк илдәрҙең хәлен күҙ алдына килтереүе еңел.

М. Афонин.

Черниковскиҙә әҙәби кисә

20 майҙа Башкорт совет яҙыусылары Черниковск ҡалаһының эшсе йәштәре менән осрашыу кисәһе үткәрҙеләр. «Ударник» клубы эшсе-йәштәр менән тулы булды.

Кисәлә яҙыусылар Союзының яуаплы секретаре шағир Хәниф Кәрим «Бөйөк рус тәнҡитсеһе революцион-демократ В. Г. Белинский» тигән темаға доклад яһаны. Докладтан һуң Р. Ниғмәти, Ғ. Гүмәр, Әкрәм Бәли, Б. Бикбай, Ҡ. Даян, С. Кулибай, Ә. Ихсан иптәштәр үҙ әҫәрҙәре менән сығыш яһанылар. Шулай уҡ халыҡ шағире Мәжит Ғафури улы Әнвәр Ғафури шағирҙең ике шиғырын уҡыны.

Әҙәби бүлек тамамланғас, концерт бирелде. Унда БАССР-ҙың атҡаҙанған артисткаһы Диана Нурмөхәмәтова, солист Мәғәфүр Хисмәтуллин, М. Рәхмәтуллин (ҡурай) һәм Р. Әхтәмов (аккордион) ҡатнашты.

Эшсе-йәштәр яҙыусыларҙың һәм артистарҙың сығыштарын тәрән яратыу менән тыңланылар.

Мәктәптәр яңы уҡыу йылына әҙерләнә

Ҡариҙел районы мәғариф работниктаре мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләү эшен киң йәйелдерҙеләр. 1600 кубометр утын ҡырҡылды һәм уның яртыһы ташылды.

Мәктәптәр ремонт материалдары менән тулыһынса тәьмин ителгәндәр. Утын әҙерләүгә, ремонт эшенә уҡыусыларҙың ата-әсәләре йәлеп ителә. Ауыл Советы һәм колхоз етәкселәре уҡытыусыларға утын әҙерләү тураһында ҙур хәстәрлек күрәләр. Берлог, Маға, бында заводы мәктәптәренә һәм уҡытыусыларына етерлек утын килтерелде.

Мәктәптәргә парта, өҫтәл, ҡара таҡталар һәм башҡа инвентарҙар менән тәьмин итеүҙә «Спартак», «Бердян» артелдәре һәм мехпром комбинаты шефлыҡ итә. 300 парта һәм башҡа кәрәк-яраҡтар эшләнде лә инде.

М. Хәбирова.

В. Г. Белинский әҫәрҙәре башкорт телендә

Бөйөк рус тәнҡитсеһе, революцион-демократ В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыуға ҡарата Башгосиздат уның тәнҡит мәҡәләләренең һайланма йыйынтығын сығара. Йыйынтыҡтың күләме 12—15 баҫма табаҡтар самаһы булып, бөйөк тәнҡитсенең рус әҙәбиәтенә баһа биргән ҙур мәҡәләләре индерелә.

Мәҡәләләрҙе Р. Ниғмәти, Ғ. Гүмәр һәм Ғ. Зөлкәрнәев иптәштәр тәржемә иттеләр. Китап В. В. Гречель һүҙ башы менән һәм уның редакцияһында сығарыла.

12 мең төп ағас ултыртылды

БҮЗӘК. Күҙәй МТС-ы коллективы быйыл яҙ МТС усадьбаһы тирәһенә 12 мең төп ағас ултыртты. Был эш менән МТС агрономы иптәш Ғәликәева етәкселек итте.

Башкорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорт управлениеһе Йоматау неврологик санаторийына, Красноусольск һәм Янғантау бальнеологик санаторийҙарына 1948 йылға ПУТЕВКАЛАР ҺАТА.

Ағымдағы йылдың сезонында был санаторийҙарҙы төҙөкләндереү һәм йыһазландырыу буйынса күп кенә саралар үткәрелде, Йоматауҙа май айынан алып ҡымыҙ менән дауалау башланасаҡ.

Путевкалар профсоюздарға, предприятиеләргә, учреждениеләргә һәм шулай уҡ курортҡа ебәреү комиссияһының заключениеһе булған айырым кешеләргә һатыла.

Путевкаларҙың хаҡы түбәндәгеһә: Йоматау санаторийына — 1200 һум. Красноусольск һәм Янғантау санаторийҙарына 900 һум.

Путевкалар алыу тураһындағы ғаризалар менән мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы 106-сы номерле йорт, 5-се ҡат, 207-се номерле бүлмә, Башкортостан һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорттар управлениеһе.

20 майҙа Өфөнөң Маяковский исемендәге баҡсаһында воскресник булды.

Һүрәттә: Электро-механика техникумы уҡыусылары сәскәләр ултыртыу өсөн түтәлдәр әҙерләйҙәр.

Х. Бикҡулов фотоһы.

Балаларҙың туристик походтары

Башкортостан балалар туристик станцияһы, ВЛКСМ-дың 30 йыллығына арнап, пионер һәм мәктәп балаларының Тыуған илде өйрәнеү буйынса өсөнсө республикан туристик походтарын үткәрергә әҙерләнә.

Республиканы өйрәнеү, сәйәхәттәр яһау пионер һәм мәктәп балаларын патриотизм рухында тәрбиәләргә, уларҙың белемдәрен арттырырға, киңәйтергә, конституция, география һәм тәбиғәт фәндәрен ныҡлы үҙләштерергә, илебеҙҙең промышленность һәм культура үҫештәре менән танышырға ярҙам итә.

Башкортостан балалар туристик станцияһы үткән йылда туристик походтар, экспедициялар, эстафеталар үткәреүҙә Бөтә Союз күләмендә икенсе урынды алғайны.

Быйыл республика буйынса туристик походтарға 200 меңгә яҡын пионер һәм мәктәп балалары ҡатнашасаҡ. Балаларҙың походтарын уңышлы үткәреү маҡсатында, район һәм республика күләмендә ойоштороу комитеттары төҙөлдө. Яһаласаҡ поход һәм экспедицияларҙың маршруты төҙөлөп, һәр бер район һәм мәктәпкә еткерелде. Походтарҙа физик яҡтан таҙа һәм йәш яғынан ҙурыраҡ балалар ҡатнашалар.

Һәр бер мәктәп, балалар йорто һәм пелучилищеларҙа, ойоштороу комитеты, уҡытыусылар, пионер вожатыйҙары етәкселегендә, пионерҙар һәм мәктәп балаларынан отрядтар төҙөлдө. Сәйәхәт һәм республиканы өйрәнеүҙең әһәмиәте тураһында занятиелар үткәрелде, маршруттар тикшерелде. Походҡа ҡатнашыусы балалар араһынан старшина, санитар, хәбәрсе, фотограф һәм башҡалар билдәләнә. Балаларҙың белемдәренә, йәштәренә ҡарап, геология, ботаника, зоология, әҙәбиәт һәм тарихты өйрәнеү звенолары төҙөлдө. Был отрядтар походтарҙа илебеҙҙең тәбиғи байлыктары, социалистик төҙөлөш һәм яңы биш йыллыктың [illegible]ханизмдары тураһында материалдар йыйнаясаҡтар. Хәҙер балалар бөжәктәр коллекцияһы төҙөү өсөн тартмалар, үҫемлек гербарийҙары өсөн папкалар әҙерләйҙәр. Республика буйынса Тыуған илде өйрәнеү походтары, экспедициялар, эстафеталар 16—20 июндән башлана.

Походтарға һәм экспедицияларға ҡатнашыусы пионерҙәр, мәктәп балалары Чапаев дивизияһы, Пугачев, Салауат Юлаев отрядтары булған урындарҙа буласаҡтар. Нефть ҡалалары — Ишембай, Октябрьскийҙа, Черниковскиҙа буласаҡтар һәм Уралдың иң матур урындарынан булған Дим, Әй, Сим йылғаларында [illegible] йөрәйәсәктәр. Стәрлетамаҡ [illegible] комбинатында, Красноусол быяла заводында, Көйөргәҙеләге [illegible] таш күмер ятышында, Башкортостан промышленносе тарихында айырым урын алып торған Белорет металлургия комбинатында, Сибай, Баймаҡ баҡыр иретеү заводтарында, республиканың [illegible] алдынғы колхоз, совхоз һәм машина-трактор станцияларында буласаҡтар. 10 кеше башкорт халҡы геройы генерал Шаймуратовтың ҡәберенә барасаҡ.

Балалар йорттарында тәрбиәләнеүселәрҙән туристик эстафеталары үткәрелә. Был эстафеталарҙа 120 балалар йортонан 2.500-гә яҡын бала ҡатнашасаҡ.

З. Ишбулатов.

— ☆ —

Художниктар союзында

СССР художниктары Союзының ойоштороу комитеты саҡырыуы буйынса Башкортостан художниктарынан Ишбулатов, Мостафин, Герасимов, Арсланов, Ежов һәм башҡа иптәштәр, 23 майҙа, Мәскәүгә киттеләр. Ойоштороу комитеты Башкортостанда һынлы искусство торошо тураһында Р. Ишбулатов иптәштең отчет докладын тыңлаясаҡ. Республика художниктары, Мәскәүҙә күрһәтеү өсөн, үҙҙәренең һуңғы эштәрен алып баралар.

ВКП(б) Өлкә Комитетының пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан сығарыла торған «Агитатор блокноты»ның 9-сы номеры баҫылып сыҡты.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

ДОГОВОР БУЙЫНСА ТӨНЬЯҠТА ЭШЛӘҮ ӨСӨН АШЫҒЫС РӘҮЕШТӘ ТҮБӘНДӘГЕ СПЕЦИАЛИСТӘР ТАЛАП ИТЕЛӘ:

И н ж е н е р ҙ ә р: тау инженерҙәре, электромеханиктар, обогатителдәр, бораулап шартлатыусылар, экономистар, химиктар, бораулаусылар, хеҙмәт буйынса экономистар, геологтар, технологтар, геодезистар, механиктар, картографтар, гидрогеологтар.

Т е х н и к т а р: тау техниктары, маркшейдерҙар, электромеханиктар, бораулап шартлатыусылар, геологтар — минералогтар, геодезистар, геологтар, метеорологтар, тау эше нормировщиктары, бораулаусылар, физиктар-химиктар, химиктар, топографтар һәм картографтар, автотрактор эше техниктары, теплотехниктар, механиктар (экскаваторҙар һәм дизелдәр буйынса), конструкторҙар-металлургтар, хеҙмәт буйынса экономистар, радистар.

В р а ч т а р: терапевтар, медицина фельдшерҙары, медицина сестралары һәм акушеркалар.

Сауҙа һәм дөйөм туҡланыу работниктары: магазиндар мөдирҙәре, столовой мөдирҙәре, һатыусылар, материаль-хужалыҡ бүлеге мөдирҙәре, товароведтар.

Башҡа төр специалистар: бухгалтерҙар, өлкән бухгалтерҙар, 7—8 разрядтағы токарҙар, 7—8 разрядтағы расточниктар, фрезеровщиктар, I—II—III класлы шоферҙар.

Тау мастерҙары курстарында уҡыу өсөн 10 класс күләмендә белеме булған, 20 йәштән алып 30 йәшкә тиклемге һәм башҡа эштәрҙә эшләү өсөн 21 йәштән алып 35 йәшкә тиклемге ирҙәр талап ителә.

Эш шарттары килешеү буйынса. Эшкә ялланыу шарттары тураһында белешмәләр алыу өсөн, ял көнөнән тыш, һәр көн һайын иртәнге 10 сәғәттән алып киске 5-кә тиклем һәм киске 8 сәғәттән алып төнгө 12 сәғәтҡа тиклем түбәндәге адресҡа мөрәжәғәт итергә: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 7-се номерле йорт. Телефон 2—74—27.

Эшкә яллау бүлеге.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48; промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00757. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

29-сы йыл сыға

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

1948 йыл
№ 103
25
май
шишәмбе
хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөтә тракторҙарҙы тәүлек әйләнәһенә, тулы ҡеүәтендә эшләтергә! (1-се бит).

ТАСС белдереүе. (2-се бит).

Уоллестең Асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндең яуап хаты тураһында. Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата сит илдәрҙән откликтар. (2-се бит).

А. Иманғулов. — Намыҫлы хеҙмәт. (3-сө бит).

Х. Вәхитов. — Разведка (3-сө бит).

Мәктәптәрҙә экзамендар һәм һынауҙар. (3-сө бит).

Һ. Нуриева.—Һыйырҙарҙан һөттө күберәк алырға. (3-сө бит).

И. В. Сталиндең Уоллеска яҙған яуабына ҡарата государство департаментенең белдереүе. (4-се бит).

Чехословакияла һайлауҙар алдынан. (4-се бит).

Англия һуғышыусы ғәрәп ғәскәрҙәрен ҡоралландырыуҙы дауам итә. (4-се бит).

СӘСЕҮҘЕҢ ХӘЛ ИТКЕС КӨНДӘРЕ

Башҡортостан игенселәре бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған үҙҙәренең хатында бик ҙур йөкләмәләр алдылар. Был йөкләмәләрҙе үтәү республиканың һәр бер колхозының, бригадаһының, звеноһының һәм һәр бер игенсеһенең намыҫ эше. Беҙҙең үҙ йөкләмәләребеҙҙе нисек үтәүебеҙҙе бөтә ил күҙәтә.

Хәҙер яҙғы сәсеүҙә республика хеҙмәтсәндәре үҙ вәғәҙәләрен үтәү буйынса беренсе экзамен тоталар. Һабан ашлығы культуралары ни тиклем тиҙ һәм яҡшы сәселһә, беҙ Тыуған ил алдындағы вәғәҙәбеҙҙе шул тиклем уңышлы үтәйәсәкбеҙ. Күп райондарҙың һәм йәҙерләгән колхоздарҙың быйылғы яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙәре алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн беҙҙә бөтә мөмкинлектәр булыуын күрһәтәләр. Туймазы, Балтас, Дәүләкән, Белорет һәм Салауат райондары колхоздарының яҙғы сәсеүҙә өлгөлө эше бөтә райондарға ла миҫал була ала.

Ләкин тоташ республика буйынса яҙғы сәсеү барышы һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Аҡрын сәселә һәм иң яҡшы ваҡыт әрәм үтә. Бигерәк тә иртә культуралар сәсеү ғәфү ителмәҫлек һуҙыла. Яҙғы бойҙай беҙҙә төп культураларҙың береһе. Әгәр ҙә, был культураның сәсеү планын яртылаш ҡына үтәгән Мәләүез, Абзан, Хәйбулла, Воскресен һәм башҡа шуның кеүек райондар бөгөндән үҙ эштәренә отчет бирмәйҙәр икән, сәсеүҙе яҡын ике өс көн эсендә тамамлау өсөн оператив саралар күрмәйҙәр икән, ул ваҡытта сериоз ҡурҡыныс килеп тыуасаҡ һәм артабан уны төҙәтеү бик ауыр буласаҡ. Беҙ техник культуралар һәм шулай уҡ үлән сәсеүҙе лә һис бер нисә сәбәпһеҙ оҙаҡҡа һуҙабыҙ. Күп йыллыҡ үлән сәсеү планын барлыҡ тик 16 процентҡа ғына үтәне.

Ни өсөн һуң республика сәсеү темпы аҡрын бара һәм һуңғы бил көнләрҙә ул темп тағы ла түбәнәйҙе? [illegible]

[illegible]

нәғәтләнерлек түгел. Шартлы һәр бер тракторға республикала ни бары 63 гектар ер эшкәртелгән. Ә Подлуб, Йылайыр, Архангель, Бурлы һәм башҡа шуның кеүек МТС-тар шартлы һәр бер тракторға 20—25 гектар ғына ер эшкәрттеләр.

Ни өсөн һуң шулай? Сөнки күпселек урында тракторҙар бер сменала ғына эшләйҙәр, бригадаларға техник ярҙам ойошторолмауы арҡаһында тик тороуҙар массовый төҫ алған, трактористтар араһында дисциплина насар, эш нормаларын үтәү өсөн көрәш юҡ, социалистик ярыш ойошторолмаған. Агит-массовый эш бригадаларҙа насар ҡуйылған. Партия ойошмалары был етешһеҙлектәрҙе бөгөндән үк бөтөрөү һәм тракторҙар эшен яҡшыртыу буйынса практик саралар күрергә тейештәр.

Сәсеү темпы хәҙер колхоздарҙа һөрөү эшенең аҡрын барыуы тота. Был хәл партия һәм совет ойошмаларының баҫыу эштәрен дөрөҫ ойоштороуға иғтибар итмәүҙәренән килеп тыуҙы. Бурыс һөрөү эшен бөтә яҡлап көсәйтеүҙән, колхоздың күберәк көсөн һөрөүгә ылыҡтырыуҙан тора.

Хәҙер беҙҙең республика колхоздары өсөн сәсеү срогы көнләп, сәғәтләп кенә иҫәпләнергә тейеш. Беҙ иң яҡын 6—8 көн эсендә сәсеү планын бөтә культуралар буйынса ла үтәүгә һәм арттырып үтәүгә ирешергә тейешбеҙ. Бының өсөн партия, совет органдарының, һәр бер колхоз һәм совхоздың, һәр бер бригада һәм звеноның, һәр бер трактористең тағы ла көсөркөнешлерәк эшләүе кәрәк.

Бөтә көс — баҫыуға, сәсеүҙе уңышлы тамамлауға! Бына был көндәрҙә колхоз ауылының деви- [illegible]

[illegible]

Республика яҙғы сәсеүҙең хәл иткес көндәрен кисерә. [illegible] яҙғы сәсеүҙе яҡшы көндәрҙә тамамлағыҙ.

Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы [illegible] социалистик ярышта еңеүселәр тип таныйлар.

Республикала беренсе урынды алған, яҙғы сәсеү планын 20 майға 75,4 процентҡа үтәгән Туймазы районына (ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Баранов, район Советы исполкомы председателе иптәш Абдуллин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Садиков) БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы ҡалдырылды.

Сәсеү планын 69,6—69,9 процентҡа үтәп, республикала икенсе һәм өсөнсө урынды алған Белорет районына (ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Ғәлимов, район Советы исполкомы председателе иптәш Усманов, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш [illegible]) һәм Салауат районына (ВКП(б) райкомы секретаре иптәш [illegible], район Советы исполкомы председателе иптәш [illegible], район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш [illegible]) Балтас, Яңауыл [illegible]

алыны. БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтары бирелде.

Балтас, Дәүләкән, Бакалы районы [illegible]

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы [illegible]

Трактор эштәренең [illegible] планын 88 процентҡа үтәгән һәм шартлы һәр бер тракторға 113-әр гектар ер эшкәрткән Әбйәлил МТС-ы [illegible] БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. [illegible] Дәүләкән, Туймазы МТС-тары [illegible]

Бөтә тракторҙарҙы тәүлек әйләнәһенә, тулы ҡеүәтендә эшләтергә!

☆ ☆ ☆ ☆

Сәсеүҙе тамамланыҡ

Беҙҙең колхоз яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары сифатлы итеп тамамланы. Бөтәһе 359 гектар һабан ашлығы сәселде. Шул иҫәптән 150 гектар бойҙай, 55 гектар һоло, 25 гектар арпа, 47 гектар тары культураларын сәсеү өсөн ваҡыт былтырғыға ҡарағанда 2 тапҡырға ҡыҫҡартылды. Колхоз быйыл сәсеү майҙанын 100 гектарға арттырҙы.

Яҙғы сәсеү осоронда бригадалар һәм звенолар араһында социалистик ярыш ойошторолдо. Ярышыусыларҙың эш йомғаҡтары көн һайын «[illegible] тактаһына» яҙылды, колхозсылар араһында тикшерелде. Х. Ғәбделманов, В. Йәғфәров, С. Ғәлиева, Ғ. Әмиков, М. Миңнебаев иптәштәр нормаларҙы систематик рәүештә 150—200 процентҡа үтәнеләр.

Яҙғы сәсеүҙә ярышта еңеүсе иптәш Кәлимуллин бригадаһына колхоз правленеһенең һәм тәүге партия ойошмаһының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. Был бригадала Х. Ғәбделманов һәм В. Йәғфәров иптәштәрҙең звенолары айырыуса яҡшы эшләнеләр.

Дәүләкән МТС-ы ҙур ярҙам күрһәтте. Иптәш Ҡотлоәхмәт Әхмәтов етәкселек иткән трактор бригадаһы үҙенең договор йөкләмәһен 100 процентҡа үтәне. Хәҙер ул, беҙҙең колхозда эштәрҙе тамамлап, «Путь Ильича» һәм Салауат исемендәге колхоздарға ярҙамға күсте.

Колхозыбыҙҙың баҫыуҙары ужымдар менән генә түгел, инде һабан ашлыҡтар — йәм-йәшел бойҙай һәм һоло сәсеүлектәре менән дә ҡапландылар. Уларҙы беҙ яҡшы тәрбиәләрбеҙ.

Х. Әхмәтов,
Дәүләкән районы «Башҡортостан» колхозының председателе.

Алдынғы бригадаларҙа

Туҡмаҡлы МТС-ы механизаторҙары социалистик йөкләмәләрҙе үтәү өсөн үҙ-ара ярышалар. Баян Сәлиев, Ғайса Ҡадиров, М. Шәйхисламов иптәштәрҙең бригадалары алдынғылар.

«Сәрмәсән» колхозы баҫыуында эшләгән Б. Вәлиев бригадаһы яҙғы эш планын 69 процентҡа үтәне. Бөтәһе 448 гектар ер эшкәртелде, 15 ат көслө һәр бер тракторға 128-әр гектар тура килде. «Смычка» колхозында эшләгән коммунист Ғ. Ҡадиров бригадаһы һуңғы биш көнлөктә 135 урынына, 150 гектар ер эшкәртте һәм 85 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Тракторист Т. Дәүләтбаев «СТЗ-НАТИ» тракторында һәр сменала 9 гектар урынына 13—14 гектар ер эшкәртте һәм килограмм яғыулыҡҡа экономия яһаны. Шулай уҡ тракторист Рәшиҙә Ғәрифуллина һәм Мағәттәров иптәштәр ҙа смена нормаларын арттырып үтәйҙәр.

Ғ. Ғаббасов.

Пландан тыш сәсәләр

БЕЛОРЕТ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү планын срогынан алда үтәгән алдынғы «Победа» һәм «Ҡыҙыл Йондоҙ» колхоздары хәҙер пландан тыш ашлыҡ сәсәләр. Ошо көндәрҙә тағы ла биш колхоз сәсеүҙе тамамланы. Районда яҙғы сәсеүҙең государство планын 25 майға тулыһынса үтәү өсөн көрәш бара.

— Был өлгәшеүҙәргә, — ти район Советы председателе иптәш Усманов, — район колхоздарының яҙғы сәсеүгә яҡшы әҙерләнеүҙәре арҡаһында ирештек. Колхозсылар юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта алған үҙ йөкләмәләрен үтәү өсөн тырышып эшләйҙәр. Хәҙер райондың алдынғы колхоздары техник культуралар сәсәләр, йәшелсә ултырталар.

Орденлеләр бригадаһы

Эш һылыпан та трактористтар әйткәнсә барҙы. Улар тәүге көндәрҙән уҡ эштең сифатын яҡшыртыу һәм нормаларҙы арттырыу өсөн социалистик йөкләмәләр алып, ихлас энергия менән эшләй башланылар. Трактористка Анфиса Шестаева тәүге сменала уҡ тәғәрмәсле трактор менән 4,5 гектар урынына 6 гектар ер һөрҙө. Башҡа трактористтар ҙа Анфисаға тиңләшеүҙе үҙ бурыстары итеп ҡуйҙылар.

— Эш миң уйлағанса бара, — тип шатланды трактор бригадаһы бригадиры иптәш Желобецкий. Ләкин ул үҙенең шатлығын бер кемгә лә белгертмәне. Көнөн дә, төнөн дә тракторҙар янынан китмәне, эштең сифатын тикшерҙе һәм үҙенең дуҫтарын яҡшыраҡ эшләргә дәртләндерҙе.

Бригада сәсеү көнөнә тиклем баҫыуға [illegible] инде. МТС-та уң көнләккә йомғаҡ яһалып, айырым бригадаларҙың һәм трактористтарҙың нормаһы нисек үтәүҙәре ярыш таҡтаһына яҙылды.

«Хеҙмәт батырлығы өсөн» медале менән наградланған трактористтарҙан Анфиса Шестаева, Николай Желобецкий, Михаил Резванов һәм Владимир Солоха иптәштәр 15 ат көслө тракторға 7 сменала 33-әр гектар урынына, 40—51-әр гектар ер эшкәрттеләр. Орденле Виктор Желобецкий бригадаһы тәғәрмәсле ике трактор менән 10 көн эсендә 100 гектар ер һөрҙө. 102 гектар ергә культивация үткәрҙе һәм 102 гектар майҙанға иртә культуралар сәсте.

Орденлеләр бригадаһы тәүге ун көнлөктә МТС-та беренселекте алды.

Был уңыштар менән генә тынысланырға ярамай. Эштең темпын тағы ла юғарыраҡ күтәрергә һәм яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта тамамлау өсөн көрәшергә кәрәк, — тине Желобецкий трактористтарға.

Трактористтар үҙ бригадирҙәренең һүҙенә бер теләктән ҡушылдылар һәм алдынғылыҡты бирмәү өсөн ярыш байрағын тағы ла юғарыраҡ күтәрҙеләр. Ярышып эшләнгән эш гүзәл һөҙөмтәләр бирҙе. Хәҙер һәр бер тракторист 4,5 гектар урынына, 6—7 гектар ер һөрә һәм сменаға 15 гектар урынына, 20 — 22-шәр гектар ашлыҡ сәсә. Бригаданың эше көндән-көн күңеллерәк, ҡыҙыуыраҡ темп менән бара.

— Партия һәм хөкүмәт беҙҙең үткән йылғы эшебеҙҙе ҙур баһаланы. Хәҙер беҙҙең күкрәктәрҙә орден һәм медалдар ялтырай, беҙҙең бригада орденлеләр бригадаһы тип йөрөтөлә. Беҙ был почетлы исемде сәсеүҙе тиҙ һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреү, үҙ участкаларыбыҙҙан юғары урожай үҫтереп алыу менән аҡларға тейешбеҙ, — ти иптәш Желобецкий.

— Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне намыҫ менән үтәрбеҙ, быйыл трактор эштәре планын үтәүҙә һәм урожайҙы күтәреүҙә Социалистик Хеҙмәт Геройы Алехин бригадаһына тиңләшербеҙ, — тиҙәр трактористтар. Һәм улар үҙҙәре хеҙмәтләндергән Каганович исемендәге колхозда яҙғы баҫыу эштәрен ошо көндәрҙә тулыһынса тамамлау өсөн көрәшәләр.

Р. Суфиянов.
Дәүләкән МТС-ы.

Бойҙай үҫә

«Тратау» колхозы председателе иптәш Сафиуллин таң атыу менән үк йоҡоһонан торҙо ла, түшенә «Ҡыҙыл Йондоҙ» ордене беркетелгән гимнастеркаһын кейеп, баҫыу станына китте. «Колхозсыларҙы барып уятайым әле, иртәнге ашҡа тиклем бер аҙ эшләп алһындар», — тип уйланы ул. Ләкин станда бер кешене лә осратманы. Сеүәле күленән алып Ҡалатҡылы йылғаһына тиклем ҡарағылы-яҡтылы уҡ йәнле хәрәкәт башланған.

— Колхозсыларҙы эшкә иртә һин күтәрҙеңме әллә? — тип һораны Сафиуллин, баҫыуҙа осраған бригадир Ноғомандан.

— Минең әйткәнде көтәләрме ни улар, — тип яуап бирҙе бригадир көлөп.

— Һинең, дуҫҡай, өлгөрмәгән ерең булмай торған. Ай-һай.

Һалдат шинеле һәм фуражка кейгән был егетте председатель бик яҡшы белә. Улар бер йыл тыуып, бергә уйнап үҫкәндәр. Бер йыл фронтҡа киткәндәр. Армиянан ҡайтҡас, бергә колхозда эшләйҙәр, ашлыҡ үҫтерәләр.

—Ер яҡшы, урожай булыр быйыл да, — ти председатель тирә яғына һоҡланып ҡарап.

— Гектарынан кәмендә 20-шәр центнер урожай алырға һүҙ биргәнбеҙ бит. Һүҙебеҙҙә торасаҡбыҙ, — ти бригадир. Бында эш бик ойошҡанлыҡ менән бара. Ҡарттар ҙа, йәштәр ҙә баҫыуҙан ҡайтмай, ҡуна ятып эшләйҙәр. Звеновод Мырҙабаев Ишмөхәмәт бабай ҙа көн һайын үҙ участкаһындағы һабансыларҙың, сәсеүселәрҙең һәм трактористтарҙың эш сифатын, элегерәк сәскән ашлыҡтарҙың сығышын тикшерә, звено члендәренә күрһәтмәләр бирә.

Уның теләген белгән кеүек, төндә трактор бригадаһында прицепщик булып эшләгән 15-йәшлек Ваня Ишмөхәмәт бабайға:

— Бойҙай сыҡҡан, бойҙай! — тип ҡысҡыра.

— Сыҡҡан шул, балам, сыҡҡан, — тип шатлана бабай. Ағиҙел буйында иртә культураларҙың һуңғы гектарҙарын сәсеп йөрөгән саҡта оло юл буйындағы орлоксолоҡ участкаһында арпа, бойҙай йәм-йәшел булып шытып сыҡты. Ул үҫә, унан юғары урожай алыу өсөн бында бөтә хәстәрлектәр күрелә.

Ғ. Ҡотлобаев,
(үҙ хәбәрсебеҙ).
Маҡар районы.

Машиналар дөрөҫ файҙаланылмайҙар

ЕРМОЛАЕВКА. (Телеграф аша). Буденный исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Кононченко етәкселек иткән трактор бригадаһы Ермолаевка МТС-ында ғына түгел, бәлки бөтә Күйөргәҙе районында алдынғы бригада булып тора.

Ләкин МТС-та бөтә бригадалар ҙа яҡшы эшләмәйҙәр. «Коминтерн» колхозын хеҙмәтләндереүсе иптәш Андреев бригадаһы трактористтәре төндәрен тик торалар, ә көндөҙ «ЧТЗ» тракторын ер тырматыу өсөн файҙаланалар. Тракторҙарҙы дөрөҫ файҙаланмау арҡаһында бригада биш көнлөктә 125 гектар урынына тик 25 гектар ғына ер һөрөү менән сикләнде. Уға әле тағы ла 300 гектар ер һөрөргә кәрәк.

Трактористтар эштең сифаты өсөн дә көрәшмәйҙәр.

Тракторҙарҙы насар файҙаланыу арҡаһында МТС сәсеү графигенән тик өстән бер өлөшөн генә үтәп килә.

Н. Ғисмәтуллин.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәре Советында

Баҫыу эштәрендә тракторҙарҙан файҙаланыуҙы яҡшыртырға

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республиканың күпселек МТС-тарында тракторҙар паркының яҙғы сәсеүҙә сиктән тыш насар файҙаланылыуын, эш сифатына иғтибар ителмәүен билдәләне. Машина-трактор паркының насар эшләүе һөҙөмтәһендә республика колхоздары яҙғы сәсеүҙә артта ҡалалар һәм ул баҫыу эштәренең һәм пар күтәреүҙең оҙаҡҡа һуҙылыу ҡурҡынысын тыуҙыра. Улар бөтәһе лә тракторҙарға һәм тағылма инвентарҙарға техник тәрбиә күрһәтеүҙе һанға һуҡмауҙың, МТС-тар тарафынан трактор бригадаларына техник ярҙам юҡлығының, шулай уҡ трактористтарҙың смена нормаларын үтәүҙәренә кәрәкле контроль булмауының һөҙөмтәһе булып тора. Дмитриевка, Благовар, Архангель, Таймас МТС-тарында тракторҙар күп ваҡыт тик торалар, смена нормалары үтәлмәй, төнгө сменалар ойошторолмаған, шулай уҡ эш сифаты ла бик түбән.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы юғарыла күрһәтелгәндәрҙән сығып, баҫыу эштәрендә трактор паркын файҙаланыуҙы яҡшыртыу буйынса саралар тураһында ҡарар ҡабул итте. БАССР Ауыл хужалығы министре иптәш Денисовҡа, район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәренән, МТС директорҙарынан тракторҙарҙың эштәрен яҡшыртыу һәм МТС-тарҙың колхоздар менән төҙөшкән договорҙарҙы һис һүҙһеҙ үтәүҙе тәьмин итеү талап ителде. МТС-тар һәм колхоздар араһында төҙөлгән договорҙарҙы өҙөүҙә ғәйепле кешеләргә ҡарата ҡаты саралар күрергә тәҡдим ителде. БАССР ауыл хужалығы министре иптәш Денисовҡа Благовар, Таймас МТС-тары директорҙарының һис ҡәнәғәтләнмәҫлек етәкселеге, тракторҙарҙың насар эшләүе сәбәптәрен тикшерергә һәм был МТС-тарҙың эшен ҡырҡа яҡшыртыу өсөн саралар күрергә йөкмәтелде.

Район Советы исполкомдары председателдәренә МТС-тар менән колхоздар араһында төҙөшкән договорҙарҙың үтәлешенә систематик рәүештә контроль яһарға, һәр бер МТС һәм колхоз буйынса договорҙың үтәлеүен ай һайын тикшерергә, МТС-тарҙың эшен яҡшыртыу өсөн саралар күрергә, шулай уҡ етешһеҙлектәрҙе һәм договорҙы өҙөүҙе МТС-тар тарафынан да, шулай уҡ колхоздар тарафынан да үҙ-ара йәшереү фактыларын бөтөрөргә ҡушылды.

Район Советы исполкомдары председателдәренән һәм МТС-тарҙың директорҙарынан шулай уҡ түбәндәгеләр талап ителәләр: тракторҙарҙы баҫыуҙа тәүлек әйләнәһенә эшләтергә һәм бөтә трактористтарҙың да смена нормаларын үтәүҙәренә ирешергә. Һис кисекмәҫтән һәр бер трактор бригадаһына һәм тракторисҡа биш көнлөк заданиелар бирергә һәм уларҙың һис һүҙһеҙ үтәлеүен тәьмин итергә. Һәр бер бригадаға һәм тракторисҡа трактор һәм тағылма машиналарҙы техник тәрбиәләү буйынса график бирергә, техник тәрбиә ҡағиҙәләренең үтәлеүенә ҡаты контроль яһауҙы тәьмин итергә. Бөтә МТС-тарҙа тракторҙарҙың тик тороуҙарын иҫәпкә ала барырға, уның сәбәптәрен тикшерергә һәм ғәйеплеләрҙе ҡаты яуаплылыҡҡа тартырға. Һәр бер МТС-та кәмендә бер күсмә мастерской булдырырға, техник тәрбиәләү һәм баҫыуҙа ремонт эшендә трактор бригадаларына ярҙам күрһәтергә. МТС мастерскойҙарында слесарь, токарь һәм башҡа специалистарҙың тәүлек буйына дежурить итеүҙәрен булдырырға. Тракторҙарҙы бөтә тағылма инвентарҙар менән тәьмин итергә. Бер үк ваҡытта тырматмайынса һөрөүҙе тыйырға. Трактор эшенең сифатына иғтибарҙы көсәйтергә, брак эшләүгә ҡаршы киҫкен көрәш алып барырға, һәр бер ваҡиғала сифатһыҙ эште ғәйепле кешенән ҡабаттан эшләтергә. 1948 йылда тракторҙар менән һөрөүҙең яртыһын предплужникле һабандар менән үтәүҙе тәьмин итергә. Яғыулыҡты һәм майлау материалын туҙҙырыуға һәм артыҡ расход яһауға юл ҡуймаҫҡа, һәр бер МТС-та нефть продуктыларын экономиялы тотоноу сараларын билдәләргә һәм уларҙы теүәл үтәргә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы быйыл МТС-тар менән колхоздар араһында төҙөлгән договорҙарҙы үтәмәү йәки уны үтәүҙе оҙаҡҡа һуҙыу түҙеп торғоһоҙ эш, тип билдәләне һәм был эштә ғәйеплеләр ҡаты яуапҡа тартыласаҡтар, тип иҫкәртте.

ТАСС БЕЛДЕРЕҮЕ

АҠШ Государство Департаментының һуңғы белдереүе айҡанлы ТАСС Совет-Америка фекер айырымлыҡтары хаҡында совет етәксе ҡругтарының позицияһы тураһында ошо белдереүҙе яһарға полномочие алды.

Өсөнсө партиянан АҠШ президентлегенә кандидат Генри Уоллес әфәндеңең И. В. Сталин исеменә яҙылған һәм 13 майҙа совет матбуғатында баҫылып сығарылған Асыҡ хаты тураһында совет общественносена билдәле инде. Был хатта шундай мәсьәләләр бар, Уоллестең фекеренсә, был мәсьәләләр буйынса Советтар Союзы һәм Америка Ҡушма Штаттары араһында килешеүгә өлгәшергә кәрәк. Уоллес әфәндеңең ошо Асыҡ хатына яуап итеп, совет матбуғатында И. В. Сталиндең хаты 17 майҙа баҫылып сыҡты. И. В. Сталин был хатында, Уоллес әфәндеңең хатында яҙылған тәҡдимдәр ике ил араһында килешеүгә өлгәшеү өсөн яҡшы һәм уңышлы база булып тора алалар, тип белдерҙе.

Был айҡанлы АҠШ Госдепартаменте 18 майҙа, И. В. Сталиндең яуабында һаналған конкрет мәсьәләләр АҠШ менән СССР араһында ике яҡлап тикшереү предмете булып хеҙмәт итә алмайҙар, ә Берләшкән милләттәр ойошмаһында һәм Сит ил Эштәре Министрҙәре Советында был мәсьәләләрҙе тикшереү, йәнәһе, СССР позицияһы арҡаһында ыңғай һөҙөмтәләр бирмәне, тигән белдереү иғлан итте.

АҠШ Госдепартаментенең ошо белдереүенә ҡарата 19 майҙа ТАСС белдереүе иғлан ителде. Был белдереүҙә, Госдепартаменттең был позицияһы АҠШ хөкүмәтенең 4 майҙа яһаған белдереүенә тулыһынса ҡапма-ҡаршы булып тора, тип күрһәтелгәйне. АҠШ хөкүмәтенең был белдереүендә ике яҡлы һөйләшеүҙәрҙең мөмкинлеге инҡар ителмәне генә түгел, ә киреһенсә, уның шулай булыуы үҙенән-үҙе аңлашыла, тип күҙҙә тотолғайны. ТАСС белдереүендә, бынан тыш, үҙ ваҡытында, Рузвельт хөкүмәте осорында иң ауыр халыҡ-ара мәсьәләләр АҠШ, СССР һәм Великобритания вәкилдәре тарафынан тулыһынса килешеп һәм бер юлы хәл ителә килде, тип күрһәтелгәйне, һәм әгәр ҙә хәҙерге Госдепартамент державаларҙың килешелгән ҡарарға өлгәшеүҙәрен мөмкин түгел, тип иҫәпләй икән, ул саҡта быны Советтар Союзы позицияһы менән түгел, ә АҠШ-тың хәҙерге хөкүмәтенең Рузвельт политикаһынан ситкә китеп, хәҙер агрессив позицияла тороп, башҡа политика үткәреүе менән аңлатырға кәрәк.

19 майҙа Госдепартамент матбуғатта иғлан итеү өсөн АҠШ һәм СССР араһында фекер айырымлыҡтарын килтереп тыуҙыра торған мәсьәләләр буйынса 11 пункттан торған яңы өҫтәмә белдереү тапшырҙы. Был белдереү Мәскәү газеталарының бөгөнгө номерҙарында баҫылып сығарыла.

АҠШ Госдепартаментенең ошо яңы белдереүе айҡанлы ТАСС түбәндәгеләрҙе белдереү мөмкинлегенә эйә.

1. Ҡоралланыуҙарҙы ҡыҫҡартыу. Ҡоралланыуҙарҙы дөйөм ҡыҫҡартыу һәм регулировать итеү буйынса АҠШ Государство Департаменте, был мәсьәлә Имиселек Советының абай ҡоралланыуҙар буйынса комиссияһында тикшерелә, тигән иҫкәртеү яһау менән генә сикләнә. Асылда ҡоралланыуҙарҙы тиҙерәк дөйөм ҡыҫҡартыу тураһында Берләшкән милләттәр ойошмаһының Генеральный Ассамблеяһы тарафынан 1946 йылдың декабрендә бер тауыштан ҡабул ителгән ҡарар, АҠШ хөкүмәтенең Генеральный Ассамблеяның ошо ҡарарына ҡаршы ыңғайлатылған позиция алыуы арҡаһында, тормошҡа ашырылмай. Ҡоралланыуҙарҙы дөйөм ҡыҫҡартыу тураһындағы ошо ҡарарға ҡарамаҫтан, АҠШ Хөкүмәте ҡоралланыуҙарҙы һәм ҡоралды кеҫтәрҙе тағы ла нығырак үҫтереү политикаһын асыҡтан-асыҡ үткәрә, ошо саралар өсөн әленән-әле яңы миллиард долларҙар ассигновать итә.

Шул уҡ ваҡытта иһә, ҡоралланыуҙарҙы дөйөм ҡыҫҡартыу буйынса сығарылған ҡарарҙы тормошҡа ашырыу тураһындағы мәсьәлә буйынса СССР менән АҠШ араһындағы килешеү ошо айырыуса мөһим бурысты хәл итеүгә булышлыҡ итер ине, бының дөйөм тыныслыҡты нығытыу һәм ҡабартылған хәрби бюджеттар йөгөн үҙ елкәләрендә күтәреүсе халыҡтың материаль яҡтан ауыр көн-күрешен еңеләйтеү интересы өсөн кәрәклеге бөтә кешегә аңлашыла.

2. Атом ҡоралын тыйыу. Советтар Союзы атом ҡоралын мотлаҡ тыйыу һәм атом энергияһын бары тик тыныслыҡ маҡсаттарында ғына файҙаланыу яғында тора. Атом ҡоралын тыйыу шуның өсөн кәрәк инде, сөнки ул, билдәле булғанса, беренсе нәүбәттә, тыныс ҡалаларҙы һәм граждандар халҡын ҡырып бөтөрөү өсөн билдәләнгән, ә бының менән халыҡтарҙың выждангы килешә алмай.

Шуға ҡарамаҫтан, АҠШ Хөкүмәте атом ҡоралын тыйыу тураһында Советтар Союзының бөтә тәҡдимдәрен ике йыл буйына инде кире ҡағып килә һәм эште «халыҡ-ара контроль» тип аталып торған мәсьәләгә ҡайтарып ҡалдыра. Шул уҡ ваҡытта, атом ҡоралын тыйыу тураһында ҡарар булғанда ғына был ҡарарҙы ысынлап тормошҡа ашырыуҙы тәьмин итеү өсөн халыҡ-ара контроль булдырыуҙың мәғәнәле булыуы бөтә кешегә асыҡ булырға тейеш. Тап шуға күрә лә Советтар Союзы атом ҡоралын тыйыу яғында һәм, шуның менән бергә, атом ҡоралын әҙерләү мөмкинлеген булдырмау өсөн, бөтә илдәрҙә атом энергияһын эшләп сығарыу өҫтөнән эффектлы халыҡ-ара контроль булдырыу яғында тора.

Шулай итеп, Госдепартаменттең, имеш, Советтар Союзы атом энергияһына ҡарата халыҡ-ара контроль булдырыу тураһында килешеүгә өлгәшергә ҡаршылыҡ күрһәтә, тип раҫлауы бөтөнләй нигеҙһеҙ булып тора. Фактылар асылда атом ҡоралын тыйыу тураһында әлегә тиклем ҡарар ҡабул ителмәүе өсөн АҠШ Хөкүмәтенең тулыһынса яуаплы булып тороуы тураһында һөйләйҙәр. Ә бындай тыйыуҙың булмауы атом энергияһын эшләп сығарыу өҫтөнән контроль булдырыу тураһындағы тәҡдимде мәғәнәһеҙ итә.

3. Германия менән ярашыу договоры төҙөү. Госдепартаменттең 19 майҙа яһаған белдереүендә Германия менән ярашыу договоры төҙөү кәрәклеге һәм оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу тураһындағы мәсьәләне ситләтеп үтә, ә Германия мәсьәләһе буйынса килешеүҙең булмауын Советтар Союзының позицияһы менән аңлата, йәғни ғәйепте ауырыу баштан һау башҡа әүәрергә маташа.

Шул уҡ ваҡытта, Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса АҠШ, СССР һәм Великобритания Хөкүмәттәре етәкселәренең Ялта һәм Потсдам конференцияларында сығарған ҡарарҙары булғанлығы бөтә кешегә билдәле. Әгәр ҙә АҠШ Хөкүмәте Ялта һәм Потсдам конференциялары позицияһында торһа ине (ә Совет Хөкүмәте иһә быға өлгәшергә тырыша), ул саҡта Сит ил Эштәре Министрҙәре Советы үҙған йылда Мәскәү һәм Лондон кәңәшмәләрендә Германия мәсьәләһен ҡарағанда үҙ бурыстарын уңышлы үтәүенә шик тә булмаҫ ине. Был башҡаса килеп сыҡты, башлыса, шуның өсөн, сөнки АҠШ Хөкүмәте Германия менән ярашыу договорын әҙерләү тураһында Советтар Союзының тәҡдимен кире ҡаҡты, шулай уҡ Германияның үҙәк экономик департаменттәрен төҙөү тураһында совет тәҡдимен, бының туранан-тура Потсдам килешеүендә күҙҙә тотолоуына ҡарамаҫтан, кире ҡаҡты һәм шулай уҡ Германияның политик һәм экономик берҙәмлеген аяҡҡа баҫтырыу өсөн кәрәк булған дөйөм Германия хөкүмәтен ойоштороу тураһында Советтар Союзының тәҡдимен кире ҡаҡты.

АҠШ Хөкүмәте Европа халыҡтарының ныҡлы тыныслығын һәм имиселеген тәьмин итеүҙең иң мөһим шарты булып торған Германияны демилитаризациялау һәм демократизациялау тураһында Ялта һәм Потсдам ҡарарҙарын үтәмәй генә түгел, бәлки элек гитлеризмдең таянысы булып торған Германияның агрессив ҡругтарына һәм герман монополияларына таянып һәм Германияның хәрби-экономик потенциалын аяҡҡа баҫтырыуға ярҙам итеп, Германияға ҡарата туранан-тура ҡапма-ҡаршы политика үткәрә. Бындай политика Европала буласаҡ агрессия өсөн Германияның көнбайыш өлөшөн стратегик базаға әүерелдереү ҡурҡынысын эсенә ала. Германия мәсьәләһе буйынса АҠШ-тың был политикаһы хәҙер ҙә алты государствоның Лондон кәңәшмәһендә үткәрелә.

Бынан, АҠШ Хөкүмәтенең Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса Ялта һәм Потсдам ҡарарҙарын боҙоуҙа ни тиклем тәрәнгә инғәнлеге һәм ошо мөһим ҡарарҙарҙы өҙған өсөн нindәйен яуаплылыҡ өҫтөнә төшөүе күренеп тора.

4. Япония менән ярашыу договоры төҙөү. Советтар Союзы Япония менән тиҙерәк ярашыу договоры төҙөү һәм оккупацион ғәскәрҙәрҙе сығарыу яғында тора. Был ваҡиғала ла ярашыу договорын әҙерләүҙең Потсдам килешеүендә күҙҙә тотолғанса үткәрелергә тейешлеге үҙенән-үҙе аңлашылып тора. Был килешеүгә ярашлы рәүештә бөтә дошман государстволар менән, шул иҫәптән, Япония менән дә, ярашыу договорҙарын Сит ил Эштәре Министрҙәре Советенең тейешле составында, йәғни был ваҡиғала Ҡытай ҡатнашлығында, әҙерләргә тейештәр. Бынан һуң Япония менән ярашыу договорын ҡарау өсөн ҡыҙыҡһыныусы бөтә илдәрҙең конференцияһын саҡырыу, һис шикһеҙ, бик кәрәкле буласаҡ.

Потсдам килешеүенә тулыһынса ҡапма-ҡаршы рәүештә АҠШ Хөкүмәте ярашыу договорының Сит ил Эштәре Министрҙәре Советы тарафынан әҙерләнеүенә ҡаршы килә. Шуның һөҙөмтәһендә Япония менән ярашыу договорын төҙөү эше алға бармай. Шул уҡ ваҡытта АҠШ Хөкүмәте Японияның агрессив ҡругтарына Японияның хәрби-экономик потенциалын аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә һәм шуның менән тыныслыҡ эшенә зыян һала.

5. Ҡытайҙан ғәскәрҙәрҙе сығарыу. Әле 1945 йылдың декабрендә үк АҠШ, СССР һәм Великобритания Сит ил Эштәре Министрҙәренең Мәскәү кәңәшмәһендә Ҡытайҙан Совет һәм Америка ғәскәрҙәрен тиҙерәк сығарыу тураһында килешеүгә өлгәшелгәйне.

Советтар Союзы, ошо килешеүгә ярашлы рәүештә, үҙ өҫтөнә алған йөкләмәне күптән үтәне һәм үҙенең хәрби частарын Ҡытайҙан сығарҙы. Америка Ҡушма Штаттарына килгәндә, Госдепартаменттең 19 майҙа яһаған белдереүе, Американың хәрби частары әлегә тиклем Ҡытай территорияһында ҡалалар, тип раҫлай, һәм шулай итеп, АҠШ Хөкүмәте үҙ өҫтөнә алған йөкләмәне әлегә тиклем үтәмәгәнлеге күренә. Был хәлдең Ҡытайҙағы граждандар һуғышының киңәйеүенә һәм тәрәнәйеүенә генә булышлыҡ иткәнлегенә шик юҡ.

6. Кореянан ғәскәрҙәрҙе сығарыу. 1945 йылдың декабрендә өс Сит ил Эштәре Министрҙәренең Мәскәү кәңәшмәһендә Корея бойондороҡһоҙ государство итеп аяҡҡа баҫтырыу, Кореяның ваҡытлы демократик хөкүмәтен төҙөүгә булышлыҡ итеү тураһында һәм был айҡанлы Көньяҡ Кореялағы Америка ғәскәрҙәре командованиеһе һәм Төньяҡ Кореялағы Совет ғәскәрҙәре командованиеһе менән бергәләп күп кенә башҡа саралар үткәреү тураһында килешеүгә өлгәшелгәйне. Ләкин, Көньяҡ Кореяла Америка ғәскәрҙәре командованиеһе демократияға ҡаршы саралар һәм Кореяның Японияға яҡлы реакцион группаларын яҡлау юлына баҫыуы арҡаһында, Төньяҡ Кореялағы Совет командованиеһенең Көньяҡ Кореялағы Америка командованиеһе менән төҙөлгән килешеүҙең үтәлеүе мөмкин булмаһы, һәм Кореяға ҡарата Мәскәү кәңәшмәһендә билдәләнгән план өҙәлде.

Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяны берләштереүҙе тиҙләтеү һәм Кореяны берҙәм һәм бойондороҡһоҙ демократик государство итеп аяҡҡа баҫтырыу һәм Корея халҡына үҙенең эске эштәрен хәл итеү мөмкинлеген биреү өсөн, Совет Хөкүмәте 1947 йылдың октябрендә Кореянан Америка һәм Совет ғәскәрҙәрен бер үк ваҡытта 1948 йылдың башында сығарыу тураһында тәҡдим индергәйне. Советтар Союзының ошо тәҡдиме Корея халҡының бик киң ҡатламдарында ыңғай отклик тапты, ә Төньяҡ һәм Көньяҡ Кореяның демократик партиялары һәм группалары Америка һәм Совет ғәскәрҙәре Кореянан сығарылғандан һуң граждандар һуғышы башланыуға юл ҡуймаҫҡа булдылар. Ләкин Советтар Союзының был тәҡдиме АҠШ Хөкүмәте тарафынан кире ҡағылды, был бойондороҡһоҙ берҙәм демократик Корея государствоһын төҙөүгә булышлыҡ итеү тураһында Мәскәү кәңәшмәһе ҡарарына ҡапма-ҡаршы рәүештә Кореяның хәҙерге ике зонаға — Төньяҡ һәм Көньяҡ зонаға бүлеңеүенең һаҡланып ҡалыуына килтерә.

АҠШ Хөкүмәтенең баҫымы аҫтында Генеральный Ассамблея тарафынан төҙөлгән һәм Госдепартамент тарафынан иҫкә алынған Комиссияға килгәндә, был Комиссия Мәскәү кәңәшмәһе ҡарарҙары менән бер генә уртаҡ кәмәһе лә булмаған маҡсаттарға хеҙмәт итә. Был Комиссияның эшмәкәрлегенең тәжрибәһе тураһында ошо йылдың май башында Көньяҡ Кореяла был Комиссияның Америка командованиеһе менән берлектә, Корея халҡының киң массаларының протесына һәм Көньяҡ Кореяның демократик, политик партияларының һәм ойошмаларының һайлауҙарға байкот иғлан итеүҙәренә ҡарамаҫтан, Көньяҡ зона властары органдарына һайлауҙар инсценировкаһы үткәреүе бик асыҡ һөйләй.

Былар бөтәһе лә Кореяны бойондороҡһоҙ демократик государство итеп аяҡҡа баҫтырыу тураһындағы билдәле килешеүҙе үтәү өсөн, бөтә сит ил ғәскәрҙәрен Кореянан сығарыу тураһындағы Совет тәҡдимен тиҙерәк тормошҡа ашырыу талап ителеүе тураһында һөйләй.

7. Башҡа илдәрҙең милли суверенитетын хөрмәт итеү һәм уларҙың эске эштәренә тығылмау. Государстволарҙың милли суверенитетын хөрмәт итеү һәм уларҙың эске эштәренә тығылмау тураһындағы мәсьәләгә ҡағылып, Госдепартамент, был мәсьәлә буйынса фактлар бик күп һәм был йәһәттән ике Хөкүмәттең дә политикаһы һәм хәрәкәттәре бөтә кешегә лә билдәле һәм былар бөтәһе лә үҙенән-үҙе аңлайышлы, тип иҫкәртеү менән сикләнә.

Шул уҡ ваҡытта, Ҡушма Штаттар Хөкүмәтенең политикаһы һәм хәрәкәттәре АҠШ-тың һуңғы ваҡыттағы башҡа государстволарҙың эске эштәренә тығылыуын, башҡа илдәрҙең государство суверенитетын боҙоуын, башҡа илдәргә экономик һәм политик яҡтан баҫым яһауын күрһәтеүсе бик күп миҫалдарҙы эсенә ала.

Мәҫәлән, Грецияның Ҡушма Штаттар тарафынан үҙ хәрби базаһына әйләндерелгәнлеге, һәм, Американың тығылыуына таянып, грек фашистәренең грек демократтарын рәхимһеҙ рәүештә ҡырыу политикаһын үткәреүҙәре яҡшы билдәле.

Шулай уҡ АҠШ-тың Италияның да эске эштәренә тығылыуы билдәле. Был тығылыу бигерәк тә, Италияла ошо йылдың 18 апрелендә һайлауҙар үткәрелеү айҡанлы булды. Был тығылыу Италияға экономик баҫым яһауҙа, Италияның территориаль һыуҙарына Американың хәрби судноларын ебәреүҙә, Америка хәрби самолеттарының һайлауҙар алдынан Италия территорияһы өҫтөндә демонстратив осош яһауҙарында, Италияның һуғыш һөҙөмтәһендә килеп тыуған экономик яҡтан мохтаж булыуынан файҙаланып, Италиялағы бөтә эске хәлгә политик баҫым яһауҙа үҙенең күҙәлләнешен тапты.

8. Хәрби базалар. Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы башҡа государстволарҙың территорияһындағы хәрби базалар тураһындағы мәсьәлә буйынса Госдепартаменттең белдереүендә, Генеральный Ассамблеяның 1946 йыл 14 декабрь ҡарарына һылтанып, АҠШ-тың государство сиктәренән күп меңләгән километрҙар алыҫлыҡта урынлашҡан донъяның күп кенә илдәрендәге территорияларҙа Американың бик күп һанда хәрби, хәрби-диңгеҙ һәм хәрби-һауа базаларының булыуын аҡларға маташыу яһалған.

АҠШ Хөкүмәте Берләшкән милләттәр ойошмаһының башҡа территорияларында Америка хәрби базаларының булыуын был государстволар хөкүмәттәренең ризалығы менән аҡларға маташа. Шул уҡ ваҡытта, үҙ территорияларында хәрби базалар урынлашҡан күп кенә илдәрҙең Ҡушма Штаттарҙан экономик һәм политик яҡтан бойондороҡло булыуы кеүек мәсьәләләрҙе, шулай уҡ ошондай хәрби базаларҙы төҙөү менән АҠШ-тың билдәле ҡругтарының нindәй маҡсаттар һәм бурыстар ҡуйыуы тураһындағы мәсьәләне ситләтелеп үтелеүе үҙенән-үҙе аңлашыла.

СССР вәкилдәре күп тапҡырҙар, айырым алғанда, 1946 йылда Берләшкән милләттәр ойошмаһының Генеральный Ассамблеяһында бер государстволарҙың Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы икенсе государстволар территорияһында хәрби базалар тотоуына юл ҡуйылмаҫҡа тейеш түгеллеге тураһында күрһәтеп килделәр. Һуғыш тамамланғандан һәм дошман государстволар тар-мар ителгәндән һуң һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһы төҙөлгәндән һуң Берләшкән милләттәр территорияһында бындай базаларҙың булыуын, шулай уҡ сит ил ғәскәрҙәренең тороуын аҡлап булмай. Был айҡанлы, Советтар Союзы менән сиктәш булған государстволар территорияһында ла АҠШ хәрби базаларының барлығы тураһында әйтмәйенсә хәтергә төшөрөү артыҡ булмаҫ.

Хәҙерге ваҡытта ҡайһы бер государстволарҙың һәм, бигерәк тә, Ҡушма Штаттарҙың Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы государстволар территорияларында бик күп һанда хәрби базалар тотоуҙары был ойошманың төп принциптарына һыйышып алмай һәм халыҡ-ара обстановкала тотороҡһоҙлоҡтоң һәм тревоғаның көсәйеүенә ярҙам итә.

9. Халыҡ-ара сауҙа. Советтар Союзының башҡа илдәр менән булған сауҙа мөнәсәбәттәре тайпылышһыҙ рәүештә, шуның менән бергә нормаль үҙ-ара файҙалы һәм коммерческий шарттарҙа, үҫә бара. Ләкин Совет-Америка сауҙа мөнәсәбәттәре тураһында быны әйтеп булмай, сөнки АҠШ Хөкүмәте, СССР-ға ҡарата дискриминация үткәреп, Совет-Америка сауҙа килешеүен боҙа. Бынан, бында килеп тыуған түҙеп торғоһоҙ хәл өсөн кем яуаплы булып торғанлығы күренә.

Госдепартамент күрһәткән Женевала һәм Гаванала сауҙа буйынса халыҡ-ара конференцияларға килгәндә, ул саҡта, билдәле булғанынса, был конференциялар бер нindәй ҙә файҙалы һөҙөмтәләр бирмәнеләр, ә шуның менән бергә, АҠШ-тың ошо конференцияла ҡатнашыусыларға юл ҡуйғыһыҙ баҫымынҡа ҡарата күп һанда шелтәләр тыуҙырҙылар.

10. Һуғыштан зыян күргән илдәргә экономик ярҙам. Госдепартамент үҙенең белдереүендә һуғыштан зыян күргән илдәргә ярҙам күрһәтеү тураһындағы мәсьәләгә ҡағыла. Ул, йәнәһе, АҠШ башҡа илдәргә ярҙам итә һәм киң масштабта, шулай уҡ Берләшкән милләттәр аша ярҙам итә, тип күрһәтә. Ләкин бындай белдереү ысынбарлыҡҡа ярашлы түгел.

АҠШ тарафынан ҡайһы бер илдәргә күрһәтелә торған ярҙам тип атала торған нәмә Берләшкән милләттәр аша түгел, ә бер яҡлы тәртиптә ебәрелә һәм шул уҡ ваҡытта Берләшкән милләттәр ойошмаһы ситләтелә. Был ғына ла түгел, элек йәшәп килгән, эше халыҡ-ара принциптарға нигеҙләнгән һәм һуғыштан зыян күргән илдәргә байтаҡ ярҙам итеп килгән ЮНРРА, АҠШ Хөкүмәтенең ошо ойошмала ҡатнашыуҙан туранан-тура баш тартыуы арҡаһында Ҡушма Штаттар инициативаһы буйынса бөтөрөлдө.

Имиселек Советында Греция мәсьәләһен тикшергән ваҡытта СССР делегацияһы тарафынан индерелгән һәм Грецияға күрһәтелә торған ярҙам бары тик Греция халҡы интерестарында ғына һәм Имиселек Советының махсус комиссияһы күҙәтеүе аҫтында бүленергә тейеш, тип күҙҙә тотоусы тәҡдимен үҙ ваҡытында Ҡушма Штаттар Хөкүмәте тарафынан кире ҡағылыуы тураһында хәтергә төшөрөү ҙә бик урынлы.

СССР-ҙың, государстволарға ярҙам итеү Берләшкән милләттәр ойошмаһы аша ойошторолорға тейеш, тип яһаған күп кенә башҡа тәҡдимдәре кеүек үк, был тәҡдим дә АҠШ тарафынан башҡа илдәргә бирелгән ярҙамды, Берләшкән милләттәр ойошмаһы тарафынан юл ҡуйғыһыҙ хәл тип танылған политик һәм башҡа файҙалар алыу өсөн файҙаланыусы АҠШ-тың етәксе ҡругтарының ҡаршылығын килтереп тыуҙырҙы.

11. Демократия һәм граждандарлыҡ азатлыҡтары. Бөтә илдәрҙә демократияны яҡлау һәм граждандарлыҡ азатлыҡтарын тәьмин итеү тураһындағы иң мөһим мәсьәләне АҠШ Госдепартаменте Берләшкән милләттәр ойошмаһының Экономик һәм Социаль Советенең кенә хөкүмәттары буйынса комиссияһы тураһындағы икенсе дәрәжәләге әһәмиәтле мәсьәләгә ҡайтарып ҡалдырҙы, ә был комиссия иһә үҙенең эшендә нindәй ҙә булһа уңышҡа өлгәшә алмаһы.

Шул уҡ ваҡытта, АҠШ-тың Хөкүмәт ҡругтары хәҙерге ваҡытта демократия һәм граждандар азатлыҡтарын яҡлау тураһында түгел, ә башҡа илдәрҙә (Греция, Испания, Иран) реакцион, демократияға ҡаршы һәм фашистик режимдарҙы һаҡлау һәм уларҙы булдырыу тураһында хәстәрлек күрәләр. Был ҡругтар ошо рәхимһеҙ эште үтәү менән шул тиклем мауыҡҡандар, улар, тәбиғи, демократияны һәм граждандар азатлыҡтарын яҡлау тураһында уйлап та ҡарамайҙар.

Советтар Союзы бөтә илдәрҙә демократияның һәм граждандар азатлығының яҡланылыуын ныҡышмалы рәүештә талап итте һәм талап итә.

* * *

Юғарыла әйтелгәндәрҙең бөтәһенән Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙерге хәле өсөн яуаплылыҡтың кем өҫтөнә төшкәнлеге күренә.

Госдепартамент, Совет Хөкүмәтенең уступка яһамауы арҡаһында килешелгән ҡарарҙар ҡабул итергә мөмкинлек юҡ, тип раҫлай. Ләкин, фактылар Госдепартаменттең раҫлауын кире ҡағалар. Рузвельт Хөкүмәте ваҡытында иң ауыр халыҡ-ара мәсьәләләрҙең АҠШ, СССР һәм Великобританияның килешеү һәм берҙәмлек тартибендә хәл ителгәнлектәре бөтә кешегә билдәле. Ә был, ул саҡта шуға күрә мөмкин ине, сөнки Тегеран һәм Ялта конференцияларының төп ҡарарҙары лояль рәүештә үтәлделәр, ә конкрет мәсьәләләр буйынса практик ҡарарҙар, ошо төп ҡарарҙарҙы үтәү нигеҙендә, улар базаһында ҡабул ителделәр. Ул ваҡыттан алып нәмә үҙгәрҙе һуң? АҠШ Хөкүмәтенең позицияһы үҙгәрҙе. Эш АҠШ Хөкүмәтенең был конференцияларҙың ҡарарҙары менән иҫәпләшмәүендә һәм уларҙы систематик рәүештә боҙоуында тора. Ул Тегеран һәм Ялта конференциялары ҡарарҙарын боҙоп ҡына ҡалмай, — ул хатта президент Трумэн ҡатнашлығында ҡабул ителгән һәм уның тарафынан ҡул ҡуйылған Потсдам конференцияһы ҡарарҙарын да боҙа. Беҙ АҠШ Хөкүмәтенең Берләшкән милләттәр ойошмаһының Уставын һәм принциптарын боҙоуы һәм һаман һуңмаһы ваҡиғалары тураһында, уның Берләшкән милләттәр ойошмаһын үҙен һаман һуңмаһы ваҡиғалары тураһында әйтеп тә тормайбыҙ инде.

АҠШ Хөкүмәтенең ошондай позицияһының халыҡ-ара эштәрҙә прогресҡа икенсе йөкмәткеле яһай алмаҫлығы аңлайышлы.

Уоллестең Асыҡ хатына иптәш И. В. Сталиндең яуап хаты тураһында

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата сит илдәрҙән откликтәр

ПОЛЬША

ВАРШАВА, 22 май. (ТАСС). «Роботник» газетаһы үҙенең күҙәтеүендә, АҠШ Хөкүмәте үҙенең политик уйынын башҡарып ниндәй генә мотивтәр ҡулланмаһын, был уйын бик насар уйналды һәм тулыһынса уңышһыҙлыҡ менән тамамланды, тип билдәләй.

«Курьер подзенны» газетаһы СССР һәм АҠШ хөкүмәттәре араһында белдереүҙәр алышыуҙын, Уоллестең Асыҡ хатының һәм уға Генералиссимус Сталин биргән яуаптың бик ҙур әһәмиәтле икәнлеген билдәләй.

ДАНИЯ

КОПЕНГАГЕН, 22 май. (ТАСС) «Ланд ог фольк» газетаһы үҙенең «Кем тыныслыҡ теләй?» тигән башмәҡәләһендә былай тип яҙа: «АҠШ государство секретаре Маршаллдың Советтар Союзы менән булған мөнәсәбәттәрҙе тәртипкә һалыу буйынса үҙенең ынтылыштарынан баш тартыуы совет етәкселәрен ҡурҡытмаһы. Маршаллдың манёврҙарына ҡарамаҫтан, Сталин, Уоллестең Асыҡ хатына күп кенә комментарийҙар биреп, фекер алышыуҙар барышына үҙенең личный вкладын индерҙе».

КАНАДА

ОТТАВА, 22 май. (ТАСС) «Ситизен» (Оттава) газетаһы, И. В Сталиндең яуабы бик ҙур халыҡ-ара әһәмиәткә эйә, тип яҙа. Советтар Союзы менән АҠШ араһында фекер айырымлыҡтары тотоусы бөтә төп мәсьәләләр буйынса, тип яҙа «Ситизен», килешеүгә өлгәшергә мөмкин.

«Стар» (Торонто) газетаһы, иптәш Сталин яуабының йөкмәткеһе тураһында белдереп, былай тип яҙа: «Бөтә донъя халыҡтары бөтә донъяла тыныслыҡты һаҡлап ҡалыу һәм нығытыу мөмкинлеге ҡулдан ысҡындырылмаҫ, тип ышаналар».

АВСТРИЯ

ВЕНА, 22 май. (ТАСС). «Эстеррейхише фольксштимме» газетаһы үҙенең «Рустарҙың тыныс аҙымынан көслө тәьҫир» тигән мәҡәләһендә И. В. Сталиндең Уоллесҡа биргән яуабына бөтә донъя общественносенең ыңғай ҡарашы тураһында яҙа. АҠШ государство департаменте белдереүенең йөкмәткеһенә газета «Маршаллдың аҡланырға килешһеҙ маташыуы» тигән баш бирә.

ИНДИЯ

ДЕЛИ, 22 май (ТАСС). «Хиндустан стандарт» газетаһы үҙенең башмәҡәләһендә Уоллестең тәҡдимдәре нигеҙендә СССР менән АҠШ араһында һөйләшеүҙәрҙең мөмкинлеге тураһында иптәш И. В. Сталин белдереүен ҡотлай.

Төҙөүселәрҙең гүзәл уңыштары

Үҙған йылдың көҙөндә мин Черниковскиҙағы Счелочки посёлкаһында булғайным. Унда Данил исемле бер бабай менән танышһым. Данил бабай һүҙгә бик оҫҡ кеше булып сыҡты, ул миңә элекке ваҡытта Счелочки крәҫтиәндәренең тормоштары, ауыл ярлыларын кулактарҙың иҙеүҙәре тураһында һөйләне.

—Әй, улым,—тине ул,—һөйләһәң һүҙ күп инде. Бына тик Совет власе йылдарында ғына ауыл ярлыларының күҙе асылды, нефть эшкәртеү, химия заводтары һәм башка промышленность предприятиеләре төҙәлде, ауылыбыҙ эшселәр посёлкаһына әйләнде.

Беҙ беҙгә яҙ кәнә килегеҙ, беҙҙең посёлка Ағиҙелдең матур ярында ултыра,—тип дауам итте Данил бабай үҙенең һүҙен һәм посёлканың артында күренеп ятҡан ҡалҡыулыҡҡа ҡулы менән күрһәтеп, — әнә теге ҡалҡыулыҡ беҙҙең ауыл малы йөрөй торған ер ул. Ҡалҡыулыҡтан Ағиҙелдең киң туғайҙары күренеп тора, — тине.

Ошо көндәрҙә генә миңә Счелочки посёлкаһында икенсе тапкыр булырға тура килде. Данил бабай «мал йөрөй торған ер», тип күрһәткән ҡалҡыулыҡҡа күтәрелдем, унда бөтөнләй ҙур үҙгәреш, икенсе яңы посёлка барлыҡҡа килгән һәм бында бик күп яңы йорттар төҙөлә.

Бында управляющие иптәш Бапилов булған төҙөлөш трестының 4-се номерле төҙөлөш-монтаж управлениеһе коллективы ҡыҫка ғына ваҡыт эсендә, 1—2 бүлмәле торған 35 һәм 8-әр бүлмәле 35 стандарт йорт төҙөгән. Төҙөүселәр был йорттарҙың Карел-Фин республикаһында, Рига ҡалаһында эшләнеп, унан тимер юл менән ебәрелеүҙәре һәм үҙҙәренең таш нигеҙ ҡороп, ул йорттарҙы йыйыуҙары тураһында һөйләнеләр.

— Апрель айында ғына, — ти төҙөлөш-монтаж управлениеһенең начальнигы иптәш Протусевич, — 16 стандарт йорт төҙөлде. Беҙҙең коллектив үҙенең Май айы йөкләмәһен байтаҡ арттырып үтәне, а 4 айлыҡ план 108 процентҡа үтәлде. Был уртаса алғанда, һәр эшсе үҙенең нормаһын 108 процентҡа үтәй, тигән һүҙ. Ә балта оҫтаһы Винокуров, Шашкин, ташсы Ағзамов, Лежнев, мейес һалыусы Корякин һәм күп кенә башка иптәштәр көн һайын ике норма эшләп, ай һайын 1000—1200 һум эш хаҡы, 700—800 һум күләмендә премия алалар.

— Беҙ быйыл план буйынса, — ти иптәш Протусевич, — бик ҙур эштәр башҡарырға тейешбеҙ. Планда ике ҡатлы бер мисә таш йорт, поликлиника, мәктәп һалыу эштәре ҡаралған. Уларҙың нигеҙҙәре ҡоролә башланы ла инде. Яңы посёлка балалары яңы уҡыу йылын яңы мәктәптә башлаясаҡтар, а хеҙмәтсәндәр Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллыҡ тантанаһын яңы клубта үткәрәсәктәр.

И. Нигмәтуллин.

Намыҫлы хеҙмәт

Мотор геүләүҙәре һәм станок тауыштары тынғута эшселәр цех начальнигы конторайы янына йыйылдылар. Бында «күрһәткестәр таҡтаһында» асыҡ хәрефтәр менән көндәлек заданиеһең үтәлеүе, кемдең күпмелек эшләүе яҙылып ҡуйылған. Иң башта оплетчица иптәш Вавилованың исеме. Ул бер көндә ике норма үтәгән, тимәк уның хеҙмәт хаҡы ла ике тапҡырға күберәк. Ләкин берәү ҙә уның күп хеҙмәт хаҡы алыуына көнләшеп ҡарамай, уның адресенә:

— Молодец! — тигән хөрмәтләү яуа.

Ә Вавилова үҙе исемлектең иң һуңғы юлына яҙылған фамилияны бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Бында уның элекке өйрәнсегә Холеваның фамилияһы яҙылған. Вавилованың уйҙары уның тураһында. Иптәш Холева өйрәнсек булған ваҡытында производство эшен белеү өсөн бик тырышты, һынауҙы ла «отличнога» тапшырҙы. Ә хәҙер ул артта ҡалыусылар иҫәбендә. Иптәш Вавилова үҙенең өйрәнсегә был хәлдә булыуына бик ғәрләнде.

Иртәгеһен улар араһында фекер алышыу булды. Вавилова элекке өйрәнсегең үҙе эшләгән станоктарҙың береһенә ҡуйҙы һәм уның эшләүен күҙәтте. Сәбәп шунда, иптәш Холева оплеткаларҙың осон дөрөҫ бәйләмәй икән. Ә быны бик тиҙ генә белеп булмай. Тик иптәш Вавилованың тәжрибәле күҙҙәре генә уны шунда уҡ күрҙеләр. Холева үҙенең хатаһын тиҙ төҙәтте.

Стахановсы иптәш Вавилова заводта беренсе башлап ике станокты хеҙмәтләндереүгә күсте. Еңел булманы, әлбиттә. Ул үҙ эҫтендә күп эшләне, яңы методтар уйлап тапты һәм теләгенә ирешті. Хәҙер инде ул үҙ тәжрибәләре менән башҡаларҙы ҡоралландыра. Фәзәттә ярым фабрикаттарга укладка станок эҫнаһынан тыш та үткәрелә. Ә иптәш Вавилова уны станоктар янында үткәрә һәм материалда булған дефекттәрҙе шунда уҡ аса. Ошолай эшләүе арҡаһында ул машиналарҙың эшләмәй тороуын бөтөрҙө һәм һәр сменала ике тапҡырҙан күберәк продукция бирерүгә өлгәште.

Вавилова һәм уның кеүек тәжрибәле башка эшселәр менән бер рәттән заводҡа әле яңы килеүсе йәш кадрҙар эшләйҙәр. Хәмитова, Дунюшкина иптәштәр заводҡа күптән түгел килгәйнеләр, улар өлкәндәрҙең ярҙамы һәм үҙҙәренең тырышлыктары арҡаһында күп нәмәгә өйрәнделәр һәм хәҙер квалификацияларын тағы бер разрядҡа күтәрҙеләр. Иптәш Матвеева күптән түгел йәш эшсе Крыницинаны өйрәткәйне. Хәҙер ул күп кенә эштә үҙен өйрәтеүсенән уҙҙырып ебәрә. Ләкин Матвееваның быға көнсеңлеге килмәй, шатлана ғына.

— Элек беҙ, — ти иптәш Матвеева, — Крыницина менән икәү 200 деталь — мин 120, ул — 80 деталь эшләһәк, хәҙер 300 деталь — мин 170, ә иптәш Крыницина инде 130 деталь эшләйбеҙ.

Коллектив интересе менән йәшәү «Металлошланг» заводы эшселәренең мөһим сифаты ул. Киләсәк өсөн саралар бөтә коллектив менән берлектә эшләнә.

Тағы ла коллективтең шул сифаты яҡшы, бында алдынғы методтар хуплап ҡаршы алына һәм ҡулланыла. Производство новаторҙары Николай Российский һәм Василий Матросов иптәштәр өлгөһендә эшләп, коллектив күп саралар үткәрҙе. Элек станокта эшләүсе һәр бер кеше материалды үҙе әҙерләй һәм быға күп ваҡыт бүлергә мәжбүр була ине. Хәҙер был эшкә айырым кеше билдәләнде, материалдар станок янына килтереп бирелә.

Слесарь иптәш Волковтың тәкдиме буйынса ремонт үткәреүсе слесарҙар баш механиканан цех начальниктарә ҡарамағына күсерелде. Һөҙөмтә яҡшы. Хәҙер инде слесарҙар талап ителгән профилактик ремонттарҙы шунда уҡ үткәрәләр һәм был буш тороуҙарҙы ныҡ ҡыҫҡартты.

Ижади хеҙмәт коллектив өсөн яңы производство еңеүҙәре килтерә. Эшселәр, инженер-техник работниктар ленинградлылар саҡырыуы буйынса биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүгә алған йөкләмәләрен тормошҡа ашырыу өсөн көрәшеп, производство темптарын үҫтерә баралар. Намыҫлы хеҙмәт һөҙөмтәһендә ғинуар айында план 106, февралдә 114 процентҡа үтәлһә, ә март айында үтәлеш 123,4 процент тәшкил итте. Һәр бер эшсенең уртаса хеҙмәт етештереүсәнлеге 25 процентҡа күтәрелде. Май байрамы хөрмәтенә йәйелдерелгән ярыш апрель айында тағы ла яҡшыраҡ һөҙөмтәләр бирә.

Производство алдынғыларының инициативаһы һәм бөтә коллективтең намыҫлы эшләүе һәм хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт быға ошондай еңеүҙәргә килтерә.

А. Имангулов.

Завод территорияһы төҙөкләндерелә

Өфө агрегат заводы коллективы завод территорияһын культуралы итеп төҙөкләндереү буйынса ҙур эш алып бара. Цехтар эргәһенә сәскәләр ултыртыла, улар матур итеп эшләнгән рәшәткәләр менән әйләндереп алынғандар. Заводҡа инеү урынынан алып бөтә цехтарға тиклем булған юлға асфальт йәйелә. Бында бөтәһе 500 квадратметр асфальт һалынасаҡ. Тротуарҙар эргәһенә мөйыл, миләш һәм башка ағастар ултыртылды. Иптәштәр өсөн спорт майҙаны төҙәлә. Унда волейбол, баскетбол майҙандары, турник һәм башкалар буласаҡ.

Завод эсенә автотранспортҡа инеү өсөн яңы тимер ҡапҡа эшләнә. Ул бронза менән биҙәлгән, матур архитектуралы, ҡапҡа баштары электр фонарҙәре менән йыһазландырыла.

Ахун ауыл Советы алдынғылыҡ өсөн көрәшә

Ахун ауыл Советенә һайланған депутаттар беренсе сессияһы уҡ конкрет план төҙөп, уҙ-ара эш бүлешеп алғайнылар. Улар үҙҙәренә беркетелгән эштәргә ныҡышмалы рәүештә башҡарыуҙы арҡаһында хужалыҡ эштәренең бөтә тармаҡтары буйынса ла ҙур уңыштарға өлгәшеп килделәр.

Ауыл хужалығы даими комиссияһы председателе иптәш Нәзифә Кальметева үҙенең эшен планлы рәүештә алып бара. Ул комиссия члендарына тапшырылған эштәрҙең үтәлешен тикшереп һәм, кәрәк икән, практик ярҙам күрһәтә.

Мәҫәлән, депутат иптәш Хөсәен Хафизоваға малсылыҡ менән етәкселек итеү эше тапшырылған. Кальметева һәм ауыл Советы председателе Галин иптәштәренең практик ярҙамында ул колхоз фермаларындағы малдарҙың торошо тураһында көн тәртибен әҙерләп, 18 февралдә сессияла доклад яһаны.

Депутаттар малсылыҡ өлкәһендә йәшен килгән етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләне, уларҙы бөтөрөү юлдарын күрһәттеләр. Был хәл мал үҫтереүгә иғтибарҙы, ул һәм уларҙың продуктлылығын күтәреүгә ныҡ ярҙам итте.

Ауыл Советы ҡарамағындағы колхоздар ... 18 майға уҡ тамамланылар.

Был ауыл Советы аҡса туплау, юл төҙөү, башҡа ағастар ултыртыу һәм башҡа хужалыҡ эштәре буйынса ла Буздәк районында беренсе урынды алып килә.

Ауыл Советенең депутаттары, Челябе өлкәһе игенселәренең республикабыҙың колхозсыларын һәм совхоз эшселәрен социалистик ярышҡа саҡырыу яҙған мөрәжәғәтен өйрәнеп, конкрет йөкләмәләр менән ике өлкә ярышын уңышлы тормошҡа ашырыу өсөн көрәшәләр. ...

Г. Идрисов. (Үҙ хәбәрсебеҙ).

Колхозда эске телефон бәйләнеше

Бөрө районының биш колхозында эске телефон бәйләнеше булдырылды. Чапаев исемендәге колхозда 13 фонлы телефон аппараты бар. Бында телефон бәйләнеше колхоздың бригадаларына, бригадирҙарының квартираларына, фермаларға, склад бинаһына һәм башка общественный урындарға ҡуйылған.

Ошондай уҡ телефон установкалары «Уҡара», «Ленинский Октябрь», Калинин һәм Ильич исемендәге колхоздарҙа ла бар.

Райондың биш колхозында бөтәһе 53 телефон ҡуйылған. Телефон сыбыҡтарының оҙонлоғо 18 километр тәшкил итә.

Мәктәптәрҙә экзамендар һәм һынауҙар

Өфө ҡалаһы өсөнсө номерле ҡыҙҙар мәктәбенең 4 «В» класс уҡыусылары беренсе көн экзаменен бөтәһе лә отлично билдәһенә тапшырҙылар.

Һүрәттә: Ошо класс отличниктарынан (һулдан уңға) Э. Кондратьева, Л. Емелина, Л. Крутова, С. Орлова, Е. Гонюх һәм Л. Конюхова. Х. Бикколов фотоһы.

Отлично һәм яҡшы билдәләренә

СТӘРЛЕТАМАҠ. (Телефон аша). Ҡаланың мәктәптәрендә экзамендар һәм һынауҙар ҙур күтәренкелек менән бара. Экзаменға бөтәһе 984 уҡыусы инергә тейеш ине. Шуларҙан тик бер генә бала килмәй ҡалды. Был йылдың беренсе көнендә 443 бала дүрт һәм биш билдәләре алды. Ҡаланың 9-сы, 11-се һәм 13-сө мәктәптәре бигерәк тә күренекле уңыштарға өлгәштеләр. Отлично һәм яҡшы билдәләре алыусыларҙың һаны был бала 50 — 60 процентҡа ташкил итә.

Ленин исемендәге башҡорт урта мәктәбенең бишенсе кластарында буйынса уҡыусы 61 баланың ҡырҡ туғыҙы экзаменда тик юғары билдәләр генә алды. Был кластарҙа БАССР-ҙың атҡаҙанған уҡытыусыһы иптәш Владимирцева эшләй. Шулай уҡ 19-сы мәктәптә иптәш Бечлова уҡытҡан 7-се класында ла балаларҙың күбеһе рус телен уҡышлы тапшырҙы.

А. Мышловец

Туймазыла

3-сө номерле урта мәктәп директоры иптәш Еремин беҙгә телефон аша түбәндәгеләрҙе һөйләне:

— Уҡыусылар һәм уҡтыусылар коллективы экзамендар һәм һынауҙар башланыуы көнөн яҡшы әҙерлек менән ҡаршыланы. Мәктәп байрам төҫө алды. Бөтә нәмә алдан төҙөлгән план буйынса эшләнгәнлектән, һынауҙар һәм экзамендар барышында бер ниндәй ҙә тотҡарлыҡ һиҙелмәй. Беренсе көндә 10-сы класта өлгөрөү аттестатына сочинение буйынса бер генә уҡыусы ла насар билдәһе алманы. Башҡа кластарҙа ла һынауҙар уңышлы үтә.

Тырышлыҡ һөҙөмтәһе

БОРАЙ. (Телефон аша). Районда дүрт урта мәктәп бар. Быйыл уларҙы 47 бала тамамлай. Борай мәктәбендә 16, Чалҡаҡ мәктәбендә 13 уҡыусының бөтәһе лә өлгөргәнлек аттестатына экзамен тота башланы. Беренсе көн уңышлы үтте. Улар үҙгән материалды тәпле үҙләштергәнлектәрен раҫланылар.

Казанцев, Кизган урта мәктәптәренең 7-се кластарында математиканан экзамендар яҡшы үтте.

И. Хәмитов.

Беҙгә хәбәр итәләр

КУШНАРЕНКО. (Телефон аша). Кушнаренко урта мәктәбе, Иҫке Ҡормаш, Карл Либкнехт, Иҫке Мортаза ете йыллыҡ мәктәптәрендә экзамендарҙың һәм һынауҙарҙың тәүге көндәре яҡшы үтте. Мәҫәлән, Кушнаренко урта мәктәбенең 7 класс уҡыусылары бөтәһе лә экзамендарға индерелде. Беренсе көндә алгебранан ун биш бала отличнога, егерме алтыһы яҡшыға, ә ҡалғандары өс билдәһенә тапшырҙы. Үрҙә күрһәтелгән бөтә мәктәптәрҙә лә хәҙергә насар билдәләр алыусылар юҡ. Һаубәттәге фәндәрҙән экзамендарға һәм һынауҙарға әҙерлек уҡытыусылар етәкселегендә ойошҡан рәүештә үткәрелә.

Алдынғылар тәжрибәһе

Һыйырҙарҙан һөттө күберәк алырға

Колхозда һыйыр һауыусы булып эшләй башлауыма хәҙер уныксы йыл инде. Был ваҡыт эсендә мин малдар тәрбиәләү, быҙауҙар үҫтереү, һыйырҙарҙан күп һөт алыу буйынса бай тәжрибә тупланым. Ҡайһы бер малсылыҡ работниктәре аҙыҡ мул булғанда ғына һыйырҙарҙың һөтөн арттырырға мөмкин, тип уйлайҙар. Малдарҙың продуктивлеген күтәреүҙә аҙыҡ базаһының роле ҙур, әлбиттә. Ләкин аҙығы күп булған колхоздарҙа ла малдарҙың үлеү, аҙ продукт биреү ваҡиғалары бик күп бит. Шулай булғас, аҙыҡтың күп булыуы ғына етмәй. Малдарҙы фән ҡушҡанса тәрбиәләү, уларҙың рационын төрләндереү буйынса эште яҡшыртырға кәрәк.

Беҙ фермала ныҡлы тәртип булдырҙыҡ. Һыйырҙарҙы тәүлегенә өс тапҡыр һауыу, уларҙың елененн йыуыу һәм массаж яһау, аҙыҡты ваҡытында норма буйынса биреү, малдарҙы систематик рәүештә асыҡ һауала йөрөтөү минең көндәлек эшемә әйләнде. Шул уҡ ваҡытта беҙ мал торлаҡтарын һәр ваҡыт таҙа тотабыҙ. Эште шулай ойоштороу һөҙөмтәһендә мин хәтта ауыр һуғыш йылдарында ла, мал аҙығы етешмәгән ваҡыттарҙа ла үҙемә беркетелгән һыйырҙан һөт алыуҙы кәметмәнем.

Беҙ һәр бер һыйырҙан һөт һауып алыу, мал аҙығын дөрөҫ расходлау буйынса план төҙөйбеҙ һәм ул планды ай һайын үтәп барыу өсөн ныҡлы көрәшәбеҙ.

Үҙған йыл мин үҙемә беркетелгән 10 баш һыйырҙан 10 быҙау алып, уларҙы тулыһынса һаҡлап үҫтерҙем һәм һәр бер һауын һыйырҙан 1441-әр литр һөт һауып алдым. Планды арттырып үтәгәнем өсөн партия һәм хөкүмәт ҡарары нигеҙендә хеҙмәт көндәремә өҫтәмә рәүештә бер баш быҙау һәм 691 литр һөт бирелде.

Ә быйыл алтайлыларҙың саҡырыуына ҡушылып, үҙемә беркетелгән 10 баш һыйырҙан 12 быҙау алып үҫтерергә һәм һәр бер һауын һыйырҙан 1600 литрҙан да кәм һөт алмаҫҡа һүҙ бирҙем. Беҙҙең республикала һәр бер һыйырҙан 2000 литр һәм унан да күберәк һөт һауып алыусы алдынғылар бар. Мин улар кеүек уҡ эшләргә тырышасаҡмын. Быныҡ өсөн, билдәле, үҙемдең квалификациямды күтәреү өҫтөндә ныҡ эшләргә, алдынғыларҙың тәжрибәләрен өйрәнергә кәрәк.

Күпселек колхоздарҙа һыйырҙарҙы тик март, апрель айҙарында ғына быҙаулатыу ғәҙәткә ингән. Былай булғанда көҙгә тиклем һыйыр һөттө нормаль биреп килә лә, көҙ һәм ҡыш һөт биреүҙе аҙайта, йәки бөтөнләй туҡтата. Был дөрөҫ түгел. Һыйырҙарҙан йәй ҙә һәм шулай уҡ ҡыш та һөт алыуҙы кәметмәҫкә, ә арттыра барырға мөмкин. Быныҡ өсөн уларҙы яҡшы һәм дөрөҫ ашатыу талап ителә. Беҙҙең ферма хәҙер, һыйырҙарҙы көҙҙән уҡ быҙаулатыуҙы ҡуллана башланы. Был, беренсенән, йыл буйына нормаль һөт алыуға мөмкинлек бирһә, икенсенән, һыйырҙарҙың йышыраҡ быҙаулауына ла мөмкинлек тыуҙыра.

Ферма работниктарының яҡшы эшләүҙәре арҡаһында колхоз государствоға малсылыҡ продукттары тапшырыу йөкләмәһен йыл һайын арттырып үтәп килә. Ошо йылдың беренсе кварталында беҙ план буйынса 22 центнер урынына 83 центнер һөт тапшырҙыҡ.

Һ. Нуриева,
Мәсетле районы «Игенсе» колхозының һыйыр һауыусыһы.

Раевкала

Гостиницала бер аҙ хәл йыйғас, әпшем менән клубҡа киттек. Тыштан да бик әйбәтләп йыйыштырылған был культура учреждениеһендә кино-картина бара. Бүлмәләрҙең береһендә бильярд, шахмат уйнайҙар, икенсеһендә уҡыйҙар, клуб тирәһендәге баҡсала таныштар бара.

Тимер юлсылар формаһында кейенгән сал сәсле ҡарт, төрлө сәскәләрҙән торған букет кеүек, күмәкләп бейеүсе йәштәргә ҡарап:

— Элекке саҡ булһа быныдай рәхәтлек кемгә тейер ине?—тип һоҡланды. Был—тимер юлсылар местҡомы члены булып сыҡты. Ул беҙгә иҫке йыйылыш тураһында һөйләне. Эшселәр йыйылышта йәйге ял мәсьәләһен тикшереп, үҙҙәренең общественный баҡсаһын яңыны итеп ҡоймаларға, сәскә клумбаларын яһарға, фонтан булдырырға ҡарар иткәндәр.

* * *

Посёлка Советы секретаре эргәһенә инабеҙ. Сират ҙур ғына.

— Бөгөн эш күберәк, ғәфү итегеҙ, — ти секретарь. — Ул бөгөн 17 кеше ҡабул иткән. Шуның 14-е яңы йорт һалыр өсөн усадьба һорап, икеһе бер урамда йәшәүселәр исеменән урамға ултыртыу өсөн тополь, сирень, акация ҡыуаҡтары һорап килгән. Үткән йыл, ти секретарь, посёлкала 136 кешегә өй һалыу өсөн усадьба бүлеп бирелгәйне, ә быйыл өй һалырға теләүселәр һаны унан да артығыраҡ.

Секретарь беҙҙе посёлка Советының яҡын ваҡыт өсөн төҙөлгән пландары менән таныштырҙы. Сессия планы буйынса, быйыл посёлка баҡсаһы ҡойма менән әйләндереләсәк, элекке физкультура майҙаны яңыға баҫтырыласаҡ, Дим аръяғында массовый ял урыны ойошторола, купальня һалынасаҡ.

Бер йыл да үтмәҫ, Дим йылғаһына һалына башлаған гидростанция яҡтылыҡ бирәсәк.

Элек бында бер кабак, бер иҫке хосуси лавка булған.

— Әгәр үлгән кеше терелә торған хәл булһа, революцияға тиклемге кешеләр Раевканы танай алмаҫтар ине, — ти һоҡланып 65 йәшлек Аграфина Владимировна. Бында хәҙер 3 урта мәктәп, 2 клуб, 3 библиотека, 2 радиоузел, 3 балалар баҡсаһы, 2 ясли, больница, амбулатория, ҡатын-ҡыҙҙар һәм балалар консультацияһы, тағы бик күп культура-ағартыу учреждениеләре, предприятиеләр бар.

* * *

Посёлка Советының сессияһы бара. Ябай, ләкин таҙа кейенгән берәү һөйләй:

— Һуғыш ваҡытында посёлканың төҫә йәмһеҙләнә төшкәйне. Хәҙер ул сибәрләнеп бара инде,— ти ул.—беҙ уны иң йәмле посёлка итә алабыҙ һәм итергә тейешбеҙ. Был эштә бөтәһе лә ҡатнашһын ине. Кешеләр күптән инде өйҙәрен ағартыу өсөн аҡбур һорайҙар, ә потребкооперация работниктәре быға ҡолаҡ һалмайҙар. Урамдарҙы таҙартырға, канауҙар ҡаҙырға, ағас ултыртырға кәрәк. Бөтәһе беҙҙең эш — депутаттар эше, халыҡ эше, — тип тамамлай оратор — күптәнге фельдшер, посёлка Советы депутаты Старостин. Ултырышта ҡатнашыусылар төрлөсә, ләкин бер нәмә — халыҡтың культура кимәлен күтәреү, тормошон яҡшыртыу тураһында һөйләйҙәр.

* * *

Посёлкала бер-береһенә яҡын ғына һалынған ике ҙур йорт башҡаларҙан айырылып тора. Былар—совет власе йылдарында илгә меңәрләгән кадрҙар биргән урта мәктәптәр. Шуларҙың береһендә уҡып сыҡҡан Сорокина, медицина институтын тамамлап, хәҙер посёлкала врач булып эшләй. Был урта мәктәптәрҙә уҡып сыҡҡан йөҙҙәрсә раевкалылар илебеҙҙең төрлө урындарында инженерҙар, врачтар, педагогтар, командирҙар һәм башҡалар булып эшләйҙәр.

Мәктәптәрҙә экзамендар һәм һынауҙар бара. Раевканың йөҙҙән артыҡ улдары һәм ҡыҙҙары быйыл урта мәктәп тамамлап, тормошҡа путёвка аласаҡтар. Күптәре юғары уҡыу йорттарына китерҙәр.

Посёлканың 17 кешеһе илебеҙҙең күренекле университет һәм институттарында уҡый, а киләһе йыл улар тағы ла күберәк булыр.

Ҙур булмаған йортта урынлашҡан библиотекала беҙ урта мәктәп уҡыусыһы Зифа Хәсәнова менән йәнәшә ҡарт врач Ломоносов, йорт хозяйкаһы Антипина, район Советы башҡарма комитеты работнигы Сибәғәтуллин һәм башҡаларҙы осратабыҙ. Улар Пушкин, Горький, Маяковский һәм башҡа яҙыусыларҙың әҫәрҙәрен яратып уҡыйҙар. Библиотека көн һайын уртаса 50 кешегә китап бирә, 60-тан артыҡ кеше библиотеканың үҙендә уҡый.

— Беҙ күптән түгел генә 800-гә яҡын яңы китап алдыҡ. Хәҙер библиотека фонды 6 мең китапҡа етә. Ләкин әле китаптар етешмәй, уларға талап үҫкәнлән-үҫә, — тип һөйләй библиотека мөдире Йәмилә Сибәғәтуллина.

Раевканың иң күңелле урынтарының береһе—балалар баҡсаһы. Унда тәрбиәселәр коллективы үҙ эшен һөйөп башҡара. Балалар сәләмәт һәм культуралы булып үҫәләр. Улар хайран ҡалырлыҡ ныҡ, таҙа һәм көр күңеллеләр.

— Бына беҙҙең иң кескәйҙәребеҙ Лёня Мишкин һәм Валя Чалыгина,—тип күрһәтә тәрбиәсе, — улар яҡшы декламаторҙар һәм бейеүселәр. Былар — яҡшы художник, инженер, командир буласаҡ кешеләр,—ти ул, олораҡтар труппаһынан Аля Зеленко, Ирек Баязитов, Владик Допосиф, Олег Востренцовтарҙы күрһәтеп.

Посёлкала балалар һаны йылдан йыл арта бара. Совет халкының һаны күбәйгәндән-күбәйә.

Загс бүлеге мөдире иптәш Калашникова беҙгә ошондай бер фактыны һөйләне: төрлө ауырыуҙарҙан үлеүселәр һаны, 1928 йылдағыға ҡарағанда, 4 тапҡырға кәмегән, а балалар тыуыуы шул тиклемгә үк артҡан. Калашниковаға һәр ике көн һайын бер никах теркәргә тура килә икән.

— Өсөнсө көн генә әле «Труд» артеле итексеһе Иван Андреевич Быков менән консерва заводы эшсеһе Антонина Димитриевна Шишкина өйләнешкәйнеләр, а бөгөн паровоз машинисы Петр Фокович Бурденков менән тимер юл станцияһы экономисы Капитолина Гавриловна Прокопьева яҙылырға килделәр, — тип һөйләй загс бүлеге мөдире.

Күп тә үтмәне, тимер юл мастерскойҙары начальнигы иптәш Карпов килеп инде.

— Ҡыҙыбыҙ бар! — ти ул йылмайып. — Иптәш Калашникова донъяға килгән Светлананы — илебеҙҙең иң йәш гражданинын государство китабына яҙып ҡуйҙы.

Раевкала ҡыҙыҡлы яңы бер нәмә лә юҡ, тип үлсәмәй генә һөйләйҙәр. Бында кешеләр хеҙмәт итә, уҡый, ял итә, үҫеш, а ил өсөн быны бөтәһе лә шатлыҡлы.

Х. Вахитов.

И. В. Сталиндең Уоллескә яҙған яуабына ҡарата Государство Департаментенең белдереүе

ВАШИНГТОН, 21 май. (ТАСС). 19 майҙа АҠШ Государство Департаменте үҙенең тәүге белдереүенә 11 пункттан торған өҫтәмә матбуғатта иғлан итеү өсөн хәбәрсеҙәргә тапшырҙы. Бында ул иң мөһим халыҡ-ара мәсьәләләр буйынса килешеүгә булмауы өсөн яуаплылыҡты Советтар Союзына ауҙара:

1. Ғәҙәттәге ҡоралланыуҙарҙы регулировать итеү проблемаһына ҡағылып, Государство Департаменте, был мәсьәлә 1946 йылда Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Генеральный Ассамблеяһында тикшерелде һәм шунан бирле Имиселек Советенең Ғәҙәттәге ҡоралланыуҙар буйынса комиссияһы тикшереүендә тора, тип белдерә.

2. Атом энергияһы проблемаһына ҡағылып, Государство Департаменте Советтар Союзы халыҡ-ара контролдең тәьҫирле планы тураһында әлегә тиклем комасаулап килде, тип раҫлай. Госдепартамент, Берләшкән Милләттәр ойошмаһының атом энергияһы буйынса комиссияһының өсөнсө доклады, фактик алғанда, һөйләшеүҙәр башланған моменттан [illegible] был мәсьәләнең тупикта торғанлығын билдәләй, тип күрһәтә. Госдепартамент, комиссияла хәҙер [illegible] ил халыҡ-ара контроль планының [illegible] положениелары менән килешкән, ә Советтар Союзы, Польша һәм Украина [illegible] комиссия хәҙерге ваҡытта хатта тәьҫирле контролдең техник ҡараш нөктәһенән сығып ҡарағанда бик мөһим тип иҫәпләнгән элементтәренә ҡарата ла СССР-ҙың риҙалығына өлгәшеү мөмкин түгеллеге тураһында иғлан итергә мәжбүр булды, тип раҫлай. Государство Департаменте, бындай шарттарҙа комиссия хәҙерге ваҡытта комиссиялағы артабан һөйләшеүҙәр файҙа килтерә алмайҙар, тигән һығымтаға килде һәм бөтә проблеманы Имиселек Советена тапшырҙы һәм уны Генеральный Ассамблеяға тапшырырға тәҡдим итте, тип өҫтәй. Госдепартаментең белдереүенә ҡарағанда, комиссиялағы артабан эш файҙаһыҙ буласаҡ, тигән һығымта атом энергияһы өҫтөнән халыҡ-ара контроль булдырыуға өлгәшеү өсөн тырышлыҡтарҙы туҡтатыу тигән һүҙ түгел, ә атом энергияһы өҫтөнән халыҡ-ара контролдең тәьҫирле системаһын булдырыу тураһында килешеүгә өлгәшеү өсөн кәрәк булған фактор комиссия компетенцияһы рамкаларынан сыға тип комиссияның танығанлығын аңлата; Государство Департаменте, атом энергияһы өҫтөнән халыҡ-ара контроль проблемаһы Берләшкән милләттәр ойошмаһы алдында әлегә тиклем тора әле, һәм Ҡушма Штаттар хөкүмәте ысын тәьҫирле контролде булдырыуға һаман да ҡатнашлыҡ итергә әҙер тора, тип күрһәтә.

3. Германия мәсьәләһен тыныс юл менән регулировать итеүгә ҡағылып, Государство Департаменте вәкилдәре Ҡушма Штаттарҙың позицияһына түбәндәгесә аңлатма бирҙеләр: [illegible] Германия мәсьәләһен тыныс юл менән регулировать итеү Сит ил Эштәре Министрҙәре Советы [illegible]. Совет был мәсьәләгә арналған ике ҙур кәңәшмә үткәрҙе. Советтар Союзының оппозицияһы Ҡушма Штаттар, Англия һәм Франция тарафынан күрһәтелгән һәр бер тәҡдимгә [illegible] практик ҡаршылыҡ [illegible].

4. Япония мәсьәләһен тыныс юл менән регулировать итеүгә ҡағылып, Государство Департаментенең позицияһы түбәндәгесә: Ҡушма Штаттар Япония менән ярашыу договорын тикшереү маҡсатында алдан конференция үткәрергә Алыҫ Көнсығыш Комиссияһының башҡа 10 члены менән 1947 йылдың июлендә тәҡдим яһаны. Бындай конференцияла ҡарарҙар тауыштарҙың өстән ике өлөшө менән ҡабул ителергә тейеш ине. 8 государство был тәҡдим менән дөйөм килешкәнлектәре тураһында белдерҙе. Советтар Союзы, ярашыу договоры проблемаларын [illegible] Ҡушма Королевство, Ҡытай, СССР һәм АҠШ вәкилдәренән торған Сит ил Эштәре Министрҙәре Советы тарафынан ҡаралырға тейеш, тип белдерҙе. Ҡытай, ярашыу договоры Алыҫ Көнсығыш Комиссияһы составына инеүсе 11 ил конференцияһында ҡаралһын һәм ҡарарҙар тауыштарҙың күпселеге менән, шул иҫәптән юғарыла һанап үтелгән дүрт держава тауыштары менән ҡабул ителһен, тип тәҡдим индерҙе. Япония менән ярашыу договорын тикшереү өсөн конференция саҡырыуҙың шартҙары тураһында бер-береһенән айырылған шундай ҡараштар арҡаһындағы конфликтте хәл итеү әлегә тиклем мөмкин булманы.

5. Ҡытайҙан ғәскәрҙәрҙе эвакуациялау тураһындағы мәсьәлә буйынса Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәге позицияла торалар: 1948 йылдың 31 мартына Американың Ҡытайҙа 1.496 кешенән торған армияһы, 4.125 кешенән торған флоты һәм диңгеҙ пехотаһы бар ине. Был көстәр Ҡытайҙа Ҡытай хөкүмәтенең һорауы буйынса ҡалалар.

6. Кореянан ғәскәрҙәрҙе эвакуациялау тураһындағы мәсьәләгә ҡағылып, Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәгеләрҙе раҫлайҙар: Америка һәм Совет оккупацион ғәскәрҙәрен Кореянан сығарыу тураһындағы тәҡдимде тикшереп, Берләшкән милләттәр ойошмаһының Генеральный Ассамблеяһы үҙенең 1947 йыл 14 ноябрь резолюцияһында [illegible] Генеральный Ассамблея [illegible] ярҙам күрһәтеү өсөн Берләшкән милләттәр ойошмаһының комиссияһын төҙөнө. Украина ошо комиссияның члене итеп һайланды, ләкин унда эшләүҙән баш тартты. Советтар Союзы [illegible]

7. Милли суверенитет һәм эске эштәргә тығылмау тураһындағы мәсьәлә буйынса Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәгеләрҙе раҫлайҙар: [illegible]

8. Хәрби базалар тураһындағы мәсьәлә буйынса Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәгеләрҙе раҫлайҙар: был йәһәттән Ҡушма Штаттарҙың политикаһы Генеральный Ассамблея тарафынан 1946 йылдың 14 декабрендә бер тауыштан ҡабул ителгән резолюцияһы менән билдәләнә. Был резолюция Берләшкән милләттәр ойошмаһында член булып тороусы илләр территорияларында ҡоралды көстәрҙең һаҡланыуын һәм был члендәрҙең иркле һәм бөтә кешегә белдергән риҙалыҡтары шарттарында тыҫа рөхсәт итә. Уставтың 102-се статьяһына ярашлы рәүештә, Ҡушма Штаттар килешеүҙәргә ҡул ҡуйыу тураһындағы документтарҙы Берләшкән милләттәр ойошмаһында регистрациялауҙы практикаға индерҙе. Ҡушма Штаттар Имиселек Советендә, Имиселек Советенең күрһәтеүе буйынса хәрәкәт итеүсе ҡоралды көстәр, улар ҡайҙа ғына урынлашмаһындар, үтеү өсөн сикләнмәгән хоҡуҡтар менән һәм базаларҙы файҙаланыу хоҡуҡтары менән файҙаланһындар, тип тәҡдим итте, СССР был тәҡдимде кире ҡаҡты.

9. Халыҡ-ара сауҙа проблемаһына ҡағылып, Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәгеләрҙе раҫлайҙар: Берләшкән милләттәр конференцияһында сауҙа һәм занятость мәсьәләләре буйынса 1947 йылда [illegible] әҙерлек комитеты сессияһында 23 ил вәкиле ҡатнашты. Сауҙа һәм занятость мәсьәләләре буйынса Гавана 1947 йылдың ноябренән алып 1948 йылдың мартына тиклем барған пленар конференцияла 46 ил вәкиле ҡатнашты. Был конференцияла халыҡ-ара сауҙа ойошмаһының уставы эшләнде. Был уставтың төп маҡсаттарынан береһе халыҡ-ара сауҙалағы дискриминацияның бөтә формаларын бөтөрөүҙән тора. Совет Хөкүмәте ошо ике кәңәшмәлә ҡатнашыуҙан баш тартты.

10. [illegible]

11. Кеше хоҡуҡтары тураһындағы мәсьәлә буйынса Государство Департаменте вәкилдәре түбәндәгеләрҙе раҫлайҙар: Берләшкән милләттәр ойошмаһы, кеше хоҡуҡтары тураһындағы мәсьәләне хәл итеү үҙенең беренсе дәрәжәләге бурыстарынан береһе булып тора, тип иҫәпләне, һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһының был өлкәләге эше нык алға китмәне әле. Кеше хоҡуҡтары тураһындағы мәсьәлә буйынса Элеонора Рузвельт ханым председателлегендә яҡын килəсәк ваҡытта экономик һәм социаль советҡа һәм Генеральный Ассамблеяға кеше хоҡуҡтары буйынса декларация һәм конвенция проектын тәҡдим итәсәк. СССР һәм АҠШ кеше хоҡуҡтары тураһындағы мәсьәлә буйынса комиссияның актив члендәре булып торғанлыҡтан, ошо йәһәттән эштең шундай уҡ булһа башҡаса формала үткәрелә алыуын күҙ алдына килтереү ҡыйын. Был мәсьәлә асылда күп илдәргә ҡағылышлы халыҡ-ара проблема булып тора. Һәм Советтар Союзы булһын, шулай уҡ Ҡушма Штаттар Берләшкән милләттәр ойошмаһының комиссияһын үҙҙәренең ҡараштарын әйтеп бирергә мөмкин булған трибуна итеп ҡарайҙар.

Ял көнө, 23 майҙа, Өфөнөң «Динамо» стадионында ҙур спорт кросы үткәрелде.
Һүрәттә: Кростан бер күренеш.
В. Жданов фотоһы.

Алишер Навоиға арналған кисә

22 майҙа Ғалимдәр йортонда үзбәк классик яҙыусыһы Алишер Навоиҙың үлеүенә 500 йыл тулыуға арналған юбилей кисәһе булды. Алишер Навоиҙың тормошо һәм ижады тураһында Башҡортостандың тел, әҙәбиәт һәм тарих фәнни-тикшеренеү институты работнигы З. Шарки иптәш доклад яһаны. Докладтан һуң шағирҙар Б. Бикбай, Н. Нәжми, Ғ. Рам[...] һәм Алишер Навои әҫәрҙәр[...] үҙҙәренең тәржемәләрен [...] ҙар. Башҡорт государство акад[...] мия театры артистҡаһы Ғәли[...] Нигмәтуллина шағир Мостай Кәри[...] тарафынан тәржемә ителгән «Фә[...] һәд һәм Ширин» поэмаһын[...] әҫәрҙәр башҡарҙы.

Библиотекаһың китап фонды

Бәләбәй педучилищеһе библиотекаһының китап фонды йылдан-йыл арта бара. Хәҙер унда 38 мең китап бар.

Библиотеканың даими уҡыусылары 450 кеше иҫәпләнә. Китап уҡыусыларҙың йыйылыштары йыл [...] була, унда төрлө темаларға [...] ҡиялар, докладтар, беседалар [...] кәрелә. Библиотеканың [...] [illegible]

Дарыу үләндәре йыйыу

Башҡортостан аптека идаралығы һәр йылды дарыу үләндәре йыйыу үткәрә. Был эштәрҙе ойоштороу республикалағы 142 аптекаға йөкмәтелгән.

Быйыл да республикала 100 тоннаға яҡын дарыу үләндәре йыйылырға тейешле. Былтырғыға ҡарағанда планы 2 тоннаға арттырыла [...]. Хәҙер колхоздарҙа, аптекаларҙа, фельдшерский пункттарҙа дарыу үләндәре йыйыу көндән-көн киң йәйелә бара.

Суд залынан

Спекулянт Коморский һәм уның компанияһы

Коморский һәм уның ҡатыны Белавина—Коморская спекуляция эштәре менән 1945 йылдан бирле шөғөлләнеп килгәндәр. Улар төрлө тауарҙарҙы башҡа урындарҙан почта аша посылка һәм тимер юл буйынса багаждар менән килтергәндәр. Ул тауарҙарҙы Өфөлә ҡиммәт хаҡ менән һатҡандар.

Коморский Өфө ҡалаһының комиссион магазиндәре аша ғына юғары хаҡ менән 71 мең һумлыҡ, үҙенең агенттәре, Орлова, Манохиналар аша 42 мең һумлыҡ төрлө тауар һата. Һатылған әйберҙәрҙән килгән доходтың 10 проценте агенттәргә түләнгән, уңышлы һатыуҙар өсөн улар үҙҙәренең хужалары тарафынан натуралата әйберҙәр менән бүләкләнгәндәр.

Коморскийҙең еңел кәсеп менән байыуы тураһында үҙенең квартираһынан һатҡан ҡиммәтле йәнлек тиреһенән тегелгән 2 пальтонан 23 мең һум аҡса алыуын күрһәткәндә лә етә.

Был спекулянттең квартираһына тентеү үткәргәндә 4000-дән артыҡ төрлө ҡиммәтле — бөтәһе 825 мең һумлыҡ тауарҙар һәм әйберҙәр табыла. Улар араһында 37 каракуль тиреһе, 7 өҫтәл, 11 ҡул һәм кеҫә сәғәттәре, 300 метрҙан артыҡ мануфактура — ебәк, су[...] но, бостон, өҫ, аяҡ кейемдәр[...] алтын, көмөш, алмаз, хруста[...] һәм башҡа ҡиммәтле әйберҙәр[...] эшләнгән һауыт-һабалар, серви[...] дәр, хатта яҙыу машиналары б[...]

Ошо көндәрҙә Өфө ҡал[...] Жданов районының халыҡ су[...] спекулянт Коморскийҙең һәм у[...] ҡатыны Белавина—Коморская[...] шулай уҡ уларҙың агенттары М[...] нохинаның енәйәтсел эштәрен ҡ[...] раны. РСФСР уголовный кодекс[...] ның 107-се статьяһы нигеҙе[...] Коморскийҙе һәм Белавина—К[...] морскаяны бөтә мөлкәттәрен к[...] фисковать итеп, унар йылға ир[...] тәренән һәм улар был сроктар[...] тултырғас биш йылға граждан[...] лыҡ хоҡуҡтарынан махрум ит[...] гә, спекуляция эшендә Коморс[...] кийгә актив ярҙам һәм булышлы[...] итҡән Манохинаны 6 йылға ир[...] нән махрум итергә шулай уҡ б[...] мөлкәтен конфискацияға алыр[...] хөкөм итте.

Башҡортостан Верховный су[...] был эште тикшереп, халыҡ су[...] ның ҡарарын көсөндә ҡалдыр[...]

А. Новичков.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Чехословакияла һайлауҙар алдынан

ПРАГА, 20 май. (ТАСС). Чехословакия халҡын 30 майға билдәләнгән Милли собраниеға һайлауҙар көнөнән 10 көн бүлеп тора. Яңы һайлауҙарға әҙерлек Чехословакия общественносеның иғтибар үҙәгендә тора. Фабрикаларҙа, заводтарҙа, учреждениеларҙа һәм ауылдарҙа йыйылыштар башланды. Бында һайлаусылар депутатлыҡҡа кандидаттарҙың исемлектәре менән танышалар, милли фронт үҙәк комитетенең, илдәге айырым политик партияларҙың һәм общественный ойошмаларҙың буласаҡ һайлауҙарға ҡарата мөрәжәғәттәрен өйрәнәләр. Һайлауҙарға әҙерлек ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәре массаларының үҫә барған хеҙмәт һәм политик күтәренкелеге обстановкаһында үтә.

«Праце» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Прага өлкәһенең национализацияланған предприятиеларында эшләүсе эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр һайлау алды кампанияһының 12 көнө эсендә, 430 миллион кронға өҫтәмә продукция биреп, үҙҙәренең ҡаршылау пландарын арттырып үтәгәндәр. Аяҡ кейемдәрен эшләү комбинаты «Батя» коллективе уҙған аҙнала үҙҙәре тарафынан индерелгән ҡаршылау планын 16,7 процентҡа арттырып үтәне, ҡорос ҡойоу заводы 18 майҙа көнлөк планды 140 процентҡа үтәне. 6 мең ауылдың крәҫтиәндәре ауыл хужалығын артабан күтәреү һәм государствоға һатыу өсөн продукция етештереүҙе арттырыу буйынса үҙҙәре тарафынан индерелгән ҡаршылау планын эшләнеләр һәм хөкүмәткә тапшырҙылар.

Ҡала һәм ауылдағы киң хеҙмәтсәндәр массаларының хеҙмәт күтәренкелеге һәм ижади инициативаһы — Чехословакияла хәҙерге һайлау алды кампанияһының характерлы черталарының береһе ул.

Англия һуғышыусы ғәрәп ғәскәрҙәрен ҡоралландырыуҙы дауам итә

ЛОНДОН, 20 май. (ТАСС). 19 майҙа Англия сит ил эштәре Министерствоһы вәкиле, Англияның ғәрәп илдәре менән договорлы мөнәсәбәттәренә ҡарата 18 майҙа яһалған иҫкәртеүҙәргә ҡайһы бер «аңлатыуҙар» яһай алыуы тураһында белдерҙе. Англия, тип белдерҙе министерство вәкиле, Трансиорданияға һәм Англия менән союздаш государстволарға ярҙам итергә һәм уларҙың ҡоралды көстәрен ҡорал менән тәьмин итергә йөкләмә алды. Англия хөкүмәте, ғәрәп государстволарының законһыҙ акттар яһағанлыҡтарын билдәләгәнгә тиклем, договор йәки [illegible]

Был, хәрәкәттәрҙең законлымы йәки законһыҙмы икәнлеген хәл итеүгә булған суверенный хоҡуҡтан Англия хөкүмәте баш тарта тигән һүҙҙе аңлатмай, тигән һорауға, министерство вәкиле икеләнеп яуап биреп, Берләшкән милләттәр ойошмаһы ҡарарын ҡабул итеүҙе суверенитеттән баш тартыу, тип иҫәпләмәгәнлеген белдерҙе.

Министерство вәкиле, Израиль государствоһынан уны таныу тураһында үтенес алыныуы хаҡында раҫланы, ләкин Англия хөкүмәтенең нindәй саралар күрәсәгенә ҡарата һөйләргә бик иртә әле, тип өҫтәне.

Англия лейбористәр партияһы башҡарма комитетенең председателен һайлау

СКАРБОРО, 20 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Скарборонан хәбәр итеүенә ҡарағанда, милли тәьминәт министре Гриффите алдағы йылға Англия лейбористәр партияһы башҡарма комитетенең председателе итеп һайланған. Уның урынбаҫары итеп ошо уҡ срокҡа Дургам графствоһы горняктәре профсоюзының секретаре Уотсон һайланған.

Иптәш Маликтең Нью-Йоркҡа килеүе

НЬЮ-ЙОРК, 21 май. (ТАСС). СССР Сит ил Эштәре Министренең Урынбаҫары Я. А. Малик Нью-Йоркҡа килде. Ул отпускыға китеүсе А. А. Громыко иптәш урынына СССР-ҙың Имиселек Советендәге, Атом комиссияһындағы һәм ғәҙәттәге ҡоралланыуҙар буйынса комиссиялағы вәкиле итеп билдәләнде.

Лейноның отставкаға сығыуына ҡарата

ХЕЛЬСИНКИ, 23 май. (ТАСС). «Илта саномат» һәм «Кауппалехти» газеталары, республика президенте министр Лейноны государство советы члены һәм эске эштәр министры вазифаларынан бушатты, тип хәбәр итәләр. Эске эштәр министры вазифаларын ваҡытлыса үтәү өсөн Эйно Килпи билдәләнгән.

Газеталар республика президентенең ҡарарын баҫып сығаралар. Бында түбәндәгеләр әйтелә:

«Государство Советы члендәре, конституцияның 36-сы параграфына ярашлы рәүештә, Сеймдең ышанысы менән файҙаланырға тейеш булғанлыҡтан, ә Сейм ошо айҙың 19-сы числоһында, эске эштәр министры Лейно Сеймдең ышанысы менән файҙаланмай, тип ҡарар иткәнлектән, мин уны государство советы члены вазифаларын үтәүҙән бушатам».

«Кауппалехти» газетаһы, үҙе тарафынан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, министр Лейно отставкаға сығыу тураһында ғариза бирмәгән, тип яҙа.

Газеталар, эске эштәр министренең отставкаға сығыуы Финляндия хеҙмәтсәндәре араһында тынысһыҙлыҡ тыуҙырҙы, тип айырыуса билдәләй. Күп кенә предприятиеларҙа протест митингылары булды. Пасила тимер юл депоһында администрация эшселәргә митинг үткәреүҙе тыйҙы һәм полицияны саҡырҙы. Хельсинкиҙағы порт эшселәре кисә забастовка башларға ҡарар иттеләр. Забастовканың күпме дауам итәсәге билдәләнмәне.

Газеталарҙың хәбәр итеүенә ҡарағанда, государство советына кисә эшселәрҙең төрлө делегациялары килгән. Президент делегацияларҙы ҡабул итмәгән. Шуның һөҙөмтәһендә улар үҙҙәренең резолюцияларын һәм ғаризаларын премьер-министрға мөрәжәғәт иткәндәр. Делегациялар үҙҙәренең резолюцияларында, Хельсинки предприятиеларендә булған йыйылыштар исеменән, эске эштәр министры [illegible] Финляндия халҡының демократик союзы вәкиле булған Лейноны [illegible] ҡалдырыуҙы, тип талап иткәндәр.

ӨФӨ КОММУНАЛЬ ТӨҘӨЛӨШ ТЕХНИКУМЫ

1948-1949 уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итә.

Уҡыу срогы 4 йыл

Техникум түбәндәге специальностәр буйынса техниктар-төҙөүселәр әҙерләй: 1. торлаҡ һәм общественный биналар төҙөү һәм эксплоатациялау, 2. һыу менән тәьмин итеү һәм канализация буйынса.

Техникумға тулы булмаған урта мәктәптең йәки урта мәктәптең 7 класы күләмендә белеме булған ике енес кешеләре лә ҡабул ителәләр.

Ҡабул итеү шарттары бөтә башҡа мәктәптәрҙәге кеүек үк.

Өлкән курстарға ла уҡыусылар ҡабул ителә.

Техникумға ҡабул ителеүселәр уҡыу тамамланғанға тиклем Совет Армияһына алынмайҙар.

Уҡыуҙан өлгәшеүселәр стипендия менән тәьмин ителәләр.

Райондан килеүселәр квартира менән тәьмин ителә.

Ҡабул итеү комиссияһы иртәнге сәғәт 10-дан киске сәғәт 6-ға тиклем эшләй.

Адрес: Өфө ҡалаһы, Сталин урамы, 67-се номерлы йорт, икенсе ҡат.

Дирекция.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-72-26.

П 00761. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 104 26 май шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн большевиктарса көрәшергә! Һәр бер сәғәт ваҡыт — сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауға! (1-се бит).
П. Копьев. — Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит — совет общественносын алға хәрәкәт иттереүсе мөһим көс. (2-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. В. Назаров. — Партия йыйылыштарын яҡшы әҙерләү менән үткәрергә. (3-сө бит).
Ғ. Әхмәтшин. — Геройҙың дуҫтары. (3-сө бит).
Район газеталары биттәренән. (3-сө бит).
АЛДЫНҒЫЛАР ТӘЖРИБӘҺЕ. А. Әхмәров. — Ғиниәт Батыров баҡсаһында. (3-сө бит).
Я. Бәҙретдинов. — Государство заемдары облигацияларын алыштырыуҙы ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрергә. (4-се бит).
М. Сәхәүетдинова. — Торлаҡтарҙы яҡшы тәрбиәләргә. (4-се бит).
Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата сит ил матбуғатының откликтәре. (4-се бит).

Комбайндарҙы урожай йыйнауға өлгөлө әҙерләргә

Республикабыҙ колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең хәл иткес көндәре. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы урожайының ныҡлы нигеҙен һалыу өсөн йөҙәрләгән мең игенселәр социалистик баҫыуҙарҙа көсөркәнешле көрәш алып баралар. Бик күп колхоздар иртә культуралар сәсеү планын ғына түгел, бөтә яҙғы сәсеү планын үтәнеләр, байтаҡ майҙанда пландан тыш ашлыҡ сәстеләр. Туймазы, Белорет, Салауат һәм башҡа алдынғы райондар сәсеүҙе тулыһынса тамамлау алдында торалар.

Күпселек урындарҙа быйыл сәсеү ойошҡаныраҡ һәм ҡыҙыуыраҡ темп менән алып барыла, баҫыу эштәренең сифатына ныҡлыраҡ иғтибар бирелә, ҙур майҙандарҙан юғары урожай алыу өсөн мөһим шарттар тыуҙырыла. Мул урожай өсөн көрәш артабан тағы ла көслөрәк дауам иттерелергә тейеш. Ошо көндәр эсендә бөтә колхоздарҙа ла сәсеү планын тулыһынса үтәп, сәсеүлектәргә өлгөлө тәрбиә ойоштороргә һәм урожай йыйнауға әҙерлектә бөтә яҡлап йәйелдерергә кәрәк.

Быйыл республикабыҙҙа сәсеү майҙаны байтаҡ киңәйтелә, тимәк, урожай йыйнау эштәренең күләме лә ныҡ ҡына арта тигән һүҙ. Был хәл урожай йыйнауға яҡшыраҡ, ныҡыраҡ әҙерләнеүҙе талап итә.

Урожай йыйнауҙың уңышын күбеҙҙә комбайндар хәл итәсәк. Улар 560 мең гектар майҙанда урып-йыйнау эштәрен башҡарырға тейештәр. Нагрузка ҙур, ул үткән йылға ҡарағанда 168 мең гектарға артыҡ. Шулай булғас, быйыл комбайндар паркын әҙерләүгә һәм уларҙы файҙаланыуға бик ныҡ иғтибар бирергә кәрәк. Алда торған бурыстарҙың мөһимлеген аңлаған машина-трактор станцияларының етәкселәре комбайндар ремонтын ваҡытында башланылар, һәм уны уңышлы дауам итәләр. Мәҫәлән, Бөжөр МТС-ында комбайндар ремонты планы 20 майға 83 процентҡа үтәлде. Шәрип, Янауыл, Миәкә, Октябрь, Подгорный машина-трактор станциялары ла ремонт буйынса билдәләнгән графикте арттырып үтәп баралар.

Республикабыҙҙың башҡа МТС-тарында ла комбайндарҙы әҙерләү эшен алдынғылар кеүек ойошторорға бөтә мөмкинлектәр бар. Ләкин улар, үкенескә ҡаршы, күп урындарҙа файҙаланылманылар. Республикабыҙ буйынса комбайндар ремонты графигы үтәлмәй, 20 майға план үтәлеше ни бары 14,2 процент кенә тәшкил итә. Хатта ошо көнгә тиклем ремонтты башламаған МТС-тар ҙа бар әле. Поляик, Мрасем, Әбдрашит, Һуҡайлы, Ерген һәм башҡа ҡайһы бер машина-трактор станцияларында бер генә комбайн да ремонттан сыҡмаған. Был МТС-тарҙың етәкселәре комбайндарҙы әҙерләү эшен һуңға ҡалдырып килделәр, комбайндар ремонтын ойоштормайҙар һәм хәҙер ҙә был хатаны төҙәтеү өсөн саралар күрмәйҙәр.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы партия, совет ойошмаларынан ауыл хужалығы кампанияларын әҙерләүҙә һәм үткәреүҙә һуңға ҡалыуҙы бөтөреүҙе талап итте. Ләкин был ҡарар практикала әле лә күп кенә урындарҙа йәшәп килә. Тик шуның менән комбайндар ремонтының насар барыуын аңлатырға мөмкин.

Комбайндарҙы урожай йыйнауға әҙерләүҙе тиҙләтергә кәрәк!

бик ашығыс бөтөрөргә һәм һәр бер МТС-та ремонт эштәрен киң йәйелдерергә кәрәк. Бөтә МТС-тарҙа ла яҡшы йыһазландырылған мастерскойҙар, квалификациялы кадрҙар бар. Уларҙы дөрөҫ файҙаланғанда комбайндар ремонты графигын һис һүҙһеҙ үтәргә һәм арттырып үтәргә мөмкин. Ремонтта айырыуса иғтибар хеҙмәтте ойоштороу мәсьәләһенә йүнәлдерелергә тейеш. Һыналған һәм яҡшы һөҙөмтәләр биргән бригадно-узловой методты һәр бер МТС-та ҡулланырға кәрәк. Ул эш темпын күтәрә һәм сифат өсөн яуаплылыҡты арттыра. Был метод менән эшләгән Бөжөр, Дәүләкән МТС-тарында комбайндар ремонтлауҙа эштең һәр бер мөһим өлөшө өсөн махсус бригадалар ойошторолған, улар үҙҙәренә тапшырылған участка өсөн ҙур яуаплылыҡ һиҙәләр һәм эш нормаларын үтәүҙә яҡшы күрһәткестәргә өлгәшәләр.

Тракторҙар ремонтындағы кеүек үк, комбайндар ремонтлауҙа ла иң мөһиме сифат. Насар ремонтланған комбайн ауыл хужалығы йылының иң яуаплы осоронда тик ултырырға, урожай йыйнауҙы һуҙыуға һәм ҙур юғалтыуҙарға килтерергә мөмкин. Быны булдырмаҫ өсөн һәр бер деталде ентекле рәүештә әҙерләргә, комбайндың бөтә частарын яҡшы итеп көйләргә кәрәк. Эштең сифаты өҫтөнән даими контроль булдырылырға, аҙ ғына срена еткерелмәйенсә эшләнгән деталь яңынан ремонтланырға тейеш.

Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хатында комбайнерҙарҙың да йөкләмәләре бар. Һәр йылды комбайн менән урожай йыйнауҙа гүзәл өлгөләр күрһәткән стахановсы комбайнерҙарҙан Шмаков (Чапаев МТС-ы), Ғаязов (Йәрмәкәй МТС-ы), Резаев (Таймаҫ МТС-ы) һәм башҡа иптәштәр һәр бер комбайн менән сезонға 900—1000 гектар майҙандың урожайын йыйнарға һүҙ бирҙеләр. Приют МТС-ының комбайнеры иптәш Емельянов ике комбайн менән 1500 гектар майҙандың урожайын урып-йыйнарға йөкләмә алды. Был яуаплы, ҙур вәғәҙәне үтәү өсөн иң беренсе нәүбәттә комбайндарҙы яҡшы әҙерләргә кәрәк. Башҡортостан Ауыл хужалығы Министерствоһы, машина-трактор станцияларының етәкселәре кисекмәҫтән бөтә комбайнерҙарҙы ремонт эшенә ылыҡтырырға, улар өсөн эш шарттары тыуҙырырға, ремонттың ике сменала алып барылыуын тәьмин итергә бурыслылар.

Комбайн моторҙарын ремонтлауҙа МТС-тарға ремонт заводтары ҙур ярҙам күрһәтергә тейештәр. Ләкин улар беренсе кварталда планды үтәмәгән кеүек, икенсе кварталда ла насар эшләүҙәрендә дауам итәләр. Ике кварталда 75—120 комбайн моторы ремонтларға тейеш булған Бүздәк, Бәре ремонт заводтары ошо көнгә ни бары 9—11 моторҙы ғына ремонтлап сығарҙылар. Ремонт тресы һәм завод етәкселәре комбайндар моторын ремонтлауҙы кисекмәҫтән яҡшы итеп ойоштороп һәм МТС заказдарының ваҡытында үтәлеүен тәьмин итергә тейештәр.

Комбайндарҙы үҙ ваҡытында урожай йыйнауға әҙерләү — республикабыҙ механизаторҙарының иң мөһим бурысы. Ремонтты интенсив! Комбайндар ремонтлау темпын һәм сифатын күтәрергә, баҫыу хәбәрҙарын урып-йыйыу кампанияһына тулы әҙерләргә!

Яғыулыҡ материалына экономия яһаған өсөн премиялар

СССР Ауыл хужалығы Министры И. А. Бенедиктовтың приказы буйынса, машина-трактор станцияларында яғыулыҡ материалына экономия яһаған өсөн премиялар билдәләнде.

Яғыулыҡ материалына экономия яһаған өсөн премиялар трактор эштәре сифатына булған агротехника талаптарын һаҡлаған шарттарҙа бирелә. Тракторсы экономияланған яғыулыҡ материалының хаҡының 50 проценте, трактор бригадаһы бригадирына — 10 проценте түләнә. Шулай уҡ бригадир ярҙамсылары учетчик-заправщиктар, участка механиктары һәм МТС-тың нефть хужалығы мөдирҙәре премия ала алалар. Премиялар ауыл хужалығы эштәре сезоны тамамланыу менән, мәгәр календарь йыл аҙағында ла һуңға ҡалмайынса түләнә.

Трактор бригадалары работниктарынан эштәре буйынса яғыулыҡ материалдарына артыҡ расход яһаған өсөн [illegible] (ТАСС).

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн большевиктарса көрәшергә!

Һәр бер сәғәт ваҡыт—сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауға!

Юлбашсыға биргән вәғәҙә үтәләсәк

ПЕТРОВСК. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған коллектив хатта «Өлкәр» колхозы члендәре лә социалистик йөкләмәләр алдылар. Улар быйыл 130 гектар яҙғы бойҙайҙың һәр гектарынан 110-ар бот, 100 гектар арыштың һәр гектарынан 120-шәр бот урожай алырға һүҙ бирҙеләр.

Үткән йыл юғары урожай алған өсөн «Өлкәр» колхозының 21 члене хөкүмәт ордендәре һәм медалдәре менән наградланды. Бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн улар быйыл да намыҫ менән көрәшәләр. Яҙғы сәсеү башланыу менән колхоз баҫыуҙарында һәр көн таңдан алып, киске ҡараңғыға тиклем ҡыҙыу эш барҙы. Партия ойошмаһы секретаре Федор Исачкин һәм комсомол ойошмаһы секретаре Валентин Першин иптәштәр трактор менән көн һайын 18-әр гектар ер һөрҙөләр. Был колхозды хеҙмәтләндергән Махар МТС-ының тракторисы Валешин менән бергә колхозсы Хисмәт Мырҙағалиев һәр көн 12 гектар урынына 18 гектар ашлыҡ сәсте. Колхоздың бөтә члендәре лә баҫыу эшендә тырышып эшләнеләр.

Бөтә эш юғары темп менән алып барылыуы һөҙөмтәһендә колхоз яҙғы сәсеүҙе районда беренсе булып тамамланы. Эштең сифатына айырыуса ныҡ иғтибар бирелде. Орденле Пелагея Исачкина, Мария Иевушкина, Анна Лялькова һәм Татьяна Доронина иптәштәрҙең звенолары хәҙер инде мул ашлыҡ үҫтереү өсөн көрәшәләр.

— Беҙ бөйөк Сталинға биргән вәғәҙәне тулыһынса үтәрбеҙ,—ти колхоз председателе, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены кавалеры Алексей Степанович Ляльков.

Г. Котлобаев.

Алдынғылар кеүек эшләргә

Бәләбәй районының «Урпак», Салауат Юлаев, Чкалов һәм Фрунзе исемендәге алдынғы колхоздары һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе 7—8 эш көнөндә тамамланылар.

Чкалов исемендәге колхозда сәсеү айырыуса үҙ ойошҡанлығы менән барҙы. 183 гектар бойҙай бары тик тулғы һөрөлгән ергә, тәҙмә юл менән генә сәселде. Сәсеү алдынан ер яҡшылап тырматылды, культивацияланды. Ағыуланған һәм яровизацияланған орлоҡтар ғына сәселде.

Сәсеү менән һөрөү араһында әҙәклек булдырылманы. Бөтәһе 135 гектар ер һөрөлдө. Һабан 325 гектар ашлыҡ сәселде. Һабансылар ерҙе 20—22 сантиметрҙан да һай һөрмәнеләр. Картуф һәм киндер майҙанына 90 тонна серегән тиреҫ сығарылды.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреүҙә ҙур роль уйнаны. Колхозсылар баҫыуҙа ҡуна ятып эшләнеләр. Эш нормаһын үтәмәүсе бер генә һабансы ла, сәсеүсе лә булманы. Сәскестә эшләүселәрҙән ВКП(б) членлегенә кандидат Ғәбдрахманов, комсомол ойошмаһы секретаре Зәйнә Зиязов иптәштәр көн һайын 4 гектар урынына 5—6 гектар ашлыҡ сәстеләр. Колхозсыларҙан Ғилфанов, Салихов иптәштәр сәсеүселәрҙе өҙөклөкһөҙ рәүештә орлоҡ менән тәьмин итеп торҙолар. Һабансылар ҙа көндәлек эш нормаларын 130—150 процентҡа үтәнеләр.

Хәҙер сәсеүселәр [illegible].

Н. Сафиуллин.

Күк һағыҙ сәсеүлектәре яҡшы тәрбиәләнә

Стәрлебаш районы колхоздары күк һағыҙ сәсеүҙе тамамланылар.

Хәҙер күк һағыҙ үҫтереүсе бригадалар һәм звенолар үҙҙәренә беркетелгән участкала юғары урожай алыу өсөн сәсеүлектәрҙе ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр.

«Стәрле» колхозында Гөлсөм Ардаширова етәкселек иткән бригада 7 гектарға яҡын майҙанда күк һағыҙ сәсеүлектәрен ҡый үләндәренән таҙартты һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу эшенә башланы. Карл Маркс исемендәге колхозда бригадир иптәш Сарүәр Йәмилова 2,5 гектар майҙанда беренсе тапҡыр утауҙы һәм өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы тамамланы.

З. Халитов.

Сәсеүҙе бөттөләр

ДӘҮЛӘКӘН. (Үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районның тиҫтәләгән колхоздары сәсеүҙе тулыһынса тамамланылар. Ленин орденле Барабанов, Малукалә иптәштәр етәкселек иткән «Победа», «1 Май» колхоздары, шулай уҡ «На страже», «Башҡортостан» колхоздары иртә һәм һуңғы культуралар сәсеү планын тулыһынса үтәнеләр. Был колхоздар 300—825 гектар ашлыҡ сәстеләр.

Ғ. Идрисов.

План яртылаш ҡына үтәлде

Борай МТС-ының күпселек трактор бригадаларында эш бик аҡрын бара. «Берлек» колхозында эшләүсе Вәсимов, «Красная гора» колхозында Сәетов һәм Маркс исемендәге колхозда Лоҡманов иптәштәрҙең трактор бригадалары колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәүҙе хурлыҡлы рәүештә өҙәләр. «Берлек» колхозында трактористарға эшләү өсөн бөтә шарттар булыуға ҡарамаҫтан, өс трактор менән 15 көн буйына ни бары 269 гектар ер эшкәртелгән. Был план үтәлешенең 24 процентен генә тәшкил итә. Трактористар араһында хеҙмәт дисциплинаһы насар. Бригадир иптәш Вәсимов кемдең нисек эшләүе менән ҡыҙыҡһынмай, смена заданиеһенең үтәлеүен талап итмәй. Техник тәрбиә насар булғанлыҡтан, тракторҙар йыш ватылалар һәм бер нисә тәүлектәр буйына тик ултыралар. Смена алышыныу ваҡытында бригадир иптәш Вәсимов булмай, эш башланғанда ла һәм сменаны тапшырғанда ла тракторҙарҙың техник яҡтан төҙөклөгөнә тикшереү үткәрелмәй. Быны шуның һөҙөмтәһендә әйәһеҙлек килеп тыуа.

Маркс исемендәге колхозда эшләүсе иптәш Лоҡманов етәкселек иткән трактор бригадаһы ла һәр көндә 41 гектар ер эшкәртергә тейеш ине, ә бында хатта биш көн эсендә ни бары 59 гектар ер һөрөлдө. Бригада тәүге биш көнгә ҡарағанда эш темпын өс тапҡырға түбәнәйтте.

Быйыл МТС-та күп кенә йәш трактористар эшләйҙәр. Улар МТС етәкселәренең, механиктарҙың көндәлек ярҙамдарына бик мохтаждар. Ләкин механиктар трактор бригадаларында бик һирәк булалар, булғанда ла трактористарға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. «Красная гора» колхозында иптәш Сәетов бригадаһының тракторҙары бик йыш ватылып, аҙналар буйына тик торалар. Ә был колхозға беркетелгән участка механиге иптәш Жмурка был бригадаға бер ниндәй ҙә техник ярҙам күрһәтмәй.

МТС быйыл яҙ тракторҙар менән 11 мең гектар ер эшкәртергә тейеш. 20 майға был пландың ни бары 50 проценте генә үтәлде. МТС директоры иптәш Лядов быға бер ҙә борсолмай.

Г. Ишметов.

Үлән сәсмәйҙәр

ҠАРИҘЕЛ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Районда күп йыллыҡ үлән сәсеү тарын әҙәклектә. План тик 10 процентҡа генә үтәлде. Был культура 34 колхоздың 7-һендә генә сәселә. Ҡалған колхоздар уны баһаламайҙар.

Государствонан бирелгән 11 центнер үлән орлоғо ошо көнгә тиклем колхоздар тарафынан алынмаған. «Завет Ильича» колхозы район үҙәгенән бер генә километр алыҫлыҡта булыуға ҡарамаҫтан, үҙенә тейешле орлоҡто алмай һәм үлән сәсмәй. Район ауыл хужалығы бүлеге агрономы иптәш Ахин был колхозда йыш ҡына булһа ла, уның председателе иптәш Рогожниковтың үлән сәсеүҙе баһаламауына килешеп ҡарай.

— 20 гектар үләнде сәсергә өлгөрәрбеҙ әле,—ти иптәш Рогожников.

«Победитель», «Урал», Стаханов һәм Жуков исемендәге колхоздарҙың председателдәре лә шул уҡ ҡараштә.

Райондың орлоҡсолоҡ хужалығы булған «Первогорное» колхозында үлән үҫтереү буйынса махсус агроном — иптәш Болдырев бар. Ләкин ул үҙенең эшен юлға һалыу өсөн бер нәмә лә эшләмәй. Шуның һөҙөмтәһендә был колхозда 20 гектар урынына, ни бары 2 гектар ғына үлән сәселде. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Усманов та күп йыллыҡ үлән сәсеү эшенең барышы менән ҡыҙыҡһынмай.

Ғ. Исмәғилов.

Артта ҡалыусыларға ярҙам итәләр

МАТРАЙ. (Телеграф аша). «Новый мир» колхозы (председателе иптәш А. Ишембитов) районда беренсе булып сәсеүҙе тамамланы. 20 майға бөтәһе 720 гектар һабан ашлығы культуралары, шул иҫәптән 500 гектар бойҙай, 140 гектар һоло сәселде. Район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы «Новый мир» колхозына тапшырылды.

«Новый мир» колхозы хәҙер Матрай ауыл Советындағы колхоздарға яҙғы сәсеүҙә ярҙам ойоштороҙо. Район ауыл Советтарының яҙғы сәсеү буйынса социалистик ярышында Матрай ауыл Советы (председателе иптәш Гөлсирә Ярмөхәмәтова) алдынғы сафта бара.

Сәсеүҙең темпы ла, сифаты ла түбән

ӘСҠАР. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Әбйәлил районы колхоздары быйыл яҙғы сәсеүҙе ойошҡаныраҡ рәүештә башланылар. Райондың сәсеү орлоғо менән тулыһынса тәьмин ителеүе, туңға һөрөп ҡалдырылған 3500 гектар ерҙең булыуы, тракторҙар ремонтының срогынан алда тамамланыуы яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә тулы шарттар тыуҙырҙы.

Ләкин был мөмкинлектәр бик күп колхоздарҙа һәм тотош районда тулыһынса файҙаланылмайҙар. Сәсеүҙең темпы ла, сифаты ла түбән. Сәсеү барышы район етәкселәренең үҙҙәрен дә ҡәнәғәтләндермәй. 20 майға план 57,7 процентҡа генә үтәлде. Бишь көндә график буйынса бында 1000 гектар ер сәселергә тейеш булһа, 740 гектар ғына сәселә.

Райондағы 20-гә яҡын колхоз сәсеүҙә бик артта бара. Улар байтаҡ ерҙе яҙ һөрөп сәсергә тейештәр. Ләкин һөрөү эштәренең барышы бөтөнләй ҡәнәғәтләнерлек түгел. Мәҫәлән, «III Интернационал» колхозында сәсеү планы 24 процентҡа ғына үтәлгән. Бында яҡынан 234 гектар ер һөрөргә кәрәк. Был эште тиҙ башҡарып сығыу өсөн колхозда көс етерлек. 2 трактор, күп кенә йәнле тартыу көстәре бар. Ләкин улар насар файҙаланылалар. Көненә ни бары 6 гектар ашлыҡ сәселә, 5 гектар ер һөрөлә. Тракторҙар күберәк ватылып торалар. Аттарҙың күбеһе икенсе дәрәжәләге эштәргә файҙаланылалар.

«Алға» колхозында яҡынан 200 гектар ер һөрөргә кәрәк. Ләкин тракторҙар бында ла эшләмәйҙәр. 30 эш атының 20-һе генә баҫыу эштәрендә ҡатнаша. Трактористар ҙа, һабансылар ҙа смена һәм көндәлек нормаларҙы үтәмәйҙәр. Колхозсыларҙың бөтәһе лә баҫыу эштәренә йәлеп ителмәгәндәр. Уларҙың күптәре үҙҙәренең шәхси эштәре менән шөғөлләнәләр. Колхоз председателе иптәш Ағзамов хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн саралар күрмәй.

— Мин нәмә эшләй алам бер үҙем, актив ярҙам итмәй, — тип зарлана ул. Партия ойошмаһы колхозсылар араһында агитационно-массовый эштәрҙе алып барыуҙа насар эшләй.

«Һаҡмар» колхозында ла шундай уҡ хәл. Хужалыҡта 30 ат була тороп, ни бары 2 һабан менән генә ер һөрөлә. Һуңғы 8 көн эсендә ни бары 9 гектар ер һөрөлдө. Ә колхозда яҡынан 130 гектар ерҙе һөрөп сәсергә кәрәк.

Күп кенә колхоздарҙа эш аттары аҙ булыуға ҡарамаҫтан, мөгөҙлө эре малдарҙы файҙаланыу ойошторолмаған.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм эш сифатын яҡшыртыу өсөн колхоздарҙа саралар күрелмәй. Социалистик ярыш күп урындарҙа формаль рәүештә генә алып барыла. Алдынғылар бер төрлө лә дәртләндерелмәйҙәр. Бер генә колхозда ла «күрһәткес таҡталары» булдырылмаған. Баҫыу эштәрендә индивидуаль һәм ваҡ групнапы сдельщина ҡулланылмай. Хеҙмәтте иҫәпкә алыуҙа уравниловка йәшәй.

Баҫыу эштәренең сифатына ла иғтибар бирелмәй. «Ҡыҙыл маяҡ», Шайморатов исемендәге колхоздарҙа байтаҡ майҙанда сәсеү ҡул менән үткәрелде. «Гвардия» колхозында трактор менән сәсергә тейешле майҙан шулай уҡ ҡул менән сәселде. Агротехниканы бына ошолай тупаҫ боҙоуҙы колхоз председателе Тажиев сәскес булмауы менән аңлатмаҡсы була. Трактор бригадаһының бригадире Костыркиндең был колхозға килгәне лә юҡ. Кусимов исемендәге колхозда ҡул менән сәселгән бойҙай бер нисә көн тырматылмайынса ҡалдырылды. Участка агрономы иптәш Чурурдаюың был колхоздарҙа булғаны ла юҡ.

Агротехниканы тупаҫ боҙоуҙар тураһында күп колхоздарҙан район ауыл хужалығы бүлегенә лә һәм МТС-ҡа ла сигналдар килә. Ләкин уларҙың береһенә лә иғтибар ителмәй. МТС-тың өлкән агрономы Чебаршин, район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы Дмитриев иптәштәр колхоздарға сығып йөрөмәйҙәр, күбеһенсә сводкалар төҙөп ултырыу менән мәшғүлләнәләр.

Әбйәлил районында сәсеүҙең темпын һәм сифатын күтәреү өсөн мөмкинлектәр ҙур. Уларҙы файҙаланыу район игенселәренең изге бурысы.

Тәнкит һәм үҙ-үҙенде тәнкит—совет обществоһын алға хәрәкәт иттереүсе мөһим көс*)

Совет обществоһы ҡапма-ҡаршылыҡтар көрәшенең диалектик законы нигеҙендә үҫә. Ләкин был ҡапма-ҡаршылыҡтар, интересҭаре бер-береһенә ҡаршы булған синыфтарҙан торған обществоға ҡарағанда, бөтөнләй икенсе төрлә характерҙалар. Ул ҡапма-ҡаршылыҡтарҙы хәл итеү өсөн социаль революцияларҙың булыуы талап ителмәй. Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит был ҡаршылыҡтарҙы хәл итеүҙең иң тәҫәнле формаһы, совет обществоһын үҫтереүҙең хәрәкәт иттереүсе мөһим средствоһы булып тора. Шуға күрә лә большевиктар партияһы тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит мәсьәләһенә ҙур иғтибар бирә.

Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит — бөтә алдынғының һәм новаторлыҡтың алға китеүенә ҡомасаулаусы иҫкелеккә ҡаршы көрәш формаһы ул.

Иптәш Сталин партияның XV съездында тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡиттең совет обществоһының хәрәкәт иттереүсе бик мөһим көсө булып торғанлығын фәнни яҡтан нигеҙләне. Һәм шунан һуң да ул был мәсьәләгә күп тапҡырҙар туҡталды. 1935 йылда тимер юлсыларҙы ҡабул иткән ваҡытта транспорттың уңыштары һәм етешһеҙлектәре тураһында һөйләп, иптәш Сталин тәнҡиттән башҡа алға китеү мөмкин түгел икәнлеген айырыуса билдәләне.

«Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит— аскыс ул. Был аскыс ярҙамында беҙ социалистик төҙөлештең етешһеҙлектәрен асабыҙ, бөтөрәбеҙ һәм алға китебеҙ. Беҙҙең прогрессебеҙҙең сере бына шунда» («Правда» 2 август 1935 йыл).

Беҙҙең алға китеүебеҙгә ҡомасаулаусы иҫкергән, серегән нәмәләр бөтә халыҡ хөкөмөнә ҡуйылырға һәм бөтөрөлөргә тейешле. Был экономик, общественный тормошҡа ла һәм идеология өлкәһенә лә ҡағыла.

Ленинизм методтарының талаптарынан береһе «...пролетар партияларҙың үҙ-үҙҙәрен тәнҡит итеүгә, уларҙы үҙ хаталары өҫтөндә өйрәтеүгә һәм тәрбиәләүгә ҡайтып ҡала, сөнки партияның ысын кадрҙарын һәм ысын лидерҙарын тик шулай ғына тәрбиәләргә мөмкин» (И. Сталин, Ленинизм мәсьәләләре, 11-се баҫма, 9-сы бит).

Был талапта ленинсе теорияның һәм политиканың революцион рухы сағылған.

II Интернационалдың социалистик партиялары, бигерәк тә хәҙер, үҙ-үҙенде тәнҡитте ҡуллана алмайҙар. Сөнки тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит уларҙың эшселәргә ҡаршы хаинлек политикаларын, буржуазияға лакейҙарсә хеҙмәт итеүҙәрен шунда уҡ фаш иткән булыр ине. Шуға күрә улар үҙҙәренең хаталарын йәшерергә, үҙҙәренең хаинлектәрен һәр төрлө ялғандар менән буяп ҡалдырырға бөтә көстәре менән тырышалар.

Пролетариат партияһы үҙ-үҙен тәнҡитләүҙән ҡурҡмай, үҙ хаталарын асыҡтан-асыҡ таныуҙан ҡурҡмай. Хаталарҙы асыҡтан-асыҡ таныу һәм төҙәтеү пролетариаттың партияһын йомшартмай, ә, киреһенсә, көсәйтә генә.

Үҙ-үҙенде тәнҡит методы партия эсендәге демократияны йәйелдереүҙең, коммунистарҙың политик аңлылығын күтәреүҙең бик яҡшы средствоһы булып тора. Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит алдынғы һәм яңы башланғыстарға юл таҙарта, ойоштороуҙың иҫкергән формаларына, етешһеҙлектәргә, хаталарға ҡаршы көрәш йәйелдереүҙе тәьмин итә.

Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡиттең кадрҙарҙы тәрбиәләүҙә әһәмиәте бигерәк тә ҙур. Иптәш Сталин 1928 йылдың 12 июнендә С. иптәшкә булған яуабында: «...үҙ-үҙенде тәнҡит лозунгыһы беҙҙең партияның эш итеүе нигеҙе, пролетариат диктатураһын нығытыу сараһы, кадрҙар тәрбиәләүҙә большевистик методтың йәне булып тора» тине. (Ленинизм мәсьәләләре, 11-се баҫма, 202-се бит).

Эштә хаталар булыуы мөмкин. Ленин һәм Сталин, хаталарҙың булыуы ҡурҡыныслы түгел, ә хаталарҙы һылап ҡалдырыу, уларҙы асырға һәм уларҙы төҙәтеү өсөн ҡырҡа көрәш алып барырға теләмәү ҡурҡыныслы, тип өйрәтәләр. Тормош тарафынан күтәрелгән ҡаршылыҡтарҙы күрергә, уны ҡыйыу рәүештә асырға кәрәк. Быға тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит юлы менән генә өлгәшергә мөмкин.

Партияның үткән түгел булып үткән район, ҡала һәм өлкә конференциялары коммунистарҙың тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡиттең әһәмиәтен аңлағанлыҡтарын, тәнҡитте ҡыҫыу фактылары менән килешергә теләмәгәнлектәрен күрһәтте. Мәҫәлән, Матрай районында партия конференцияһы делегаттары ВКП(б) райкомының икенсе секретаре Байтуринде бик ныҡ тәнҡитләнеләр. Ул тәнҡитте ҡыҫҡан. Үҙен тәнҡитләгән кешеләрҙе хатта эшләгән урындарынан сығарыуға тиклем барып еткән. Һөҙөмтәлә иптәш Байтурин райкомдың яңы составына һайланманы.

Партияның өлкә конференцияһы ла тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит итеү шарттарында үтте.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының һәм, бигерәк тә, илебеҙҙә социализмдең еңеүе һөҙөмтәһендә, тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡит методын беҙҙең партиябыҙ бөтә общественный, политик һәм культура тормошонда бөтә халыҡтың достояниеһе итте. Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитте ошолай киң күләмдә ҡулланыу социалистик государствоның көсөн, массаларҙың активлегенең үҫеүен дәләлләй.

Киң массаларҙың көрәш маҡсаты үҙҙәренә асыҡ булғанда ғына, уларҙың тәнҡите боевой һәм маҡсатҡа ынтылышлы була ала. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, коммунизм төҙөү идеяһы массаларҙың иң яҡын һәм изге эше. Большевиктар партияһы үҙенең көндәлек политик эше менән массаларҙы тап ошо бурыстарҙы тормошҡа ашырыуға алып бара. Массаларҙың маҡсаты асыҡ, шуның өсөн дә улар коммунизм төҙөү юлында ҡомасаулаусы бөтә етешһеҙлектәрҙе ҡыйыу тәнҡитләйҙәр.

Социалистик ярыш — тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡиттең иң тәьҫирле формаһы ул.

«Социалистик ярыш массаларҙың эшлекле һәм революцион рәүештә үҙ-үҙҙәрен тәнҡитләүҙәренең көйҙәләнеше булып тора. Ул миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙең ижади инициативаһына таяна» (Сталин).

Совет социалистик обществоһын үҫтереү өсөн стахановсылар хәрәкәтенең әһәмиәте ғәҙәттән тыш ҙур. Социалистик ярыш, стахановсылар хәрәкәте — яңы тормош төҙөүҙең коммунистик методы — коммунистик обществоның түбәнге фазаһынан уның юғары фазаһына күсеүҙең иң кәрәкле шарты булып тора. Стахановсылар хәрәкәте донъяға тыуғандан алып социализмдән аҡрынлап коммунизмға күсеү башлана тип әйтергә мөмкин. Стахановсылар хәрәкәте ысын-ысындан коммунистик аң тыуҙырыуға булышлыҡ итә һәм аҡыл хеҙмәте менән физик хеҙмәт араһында быуаттарҙан бирле йәшәп килгән ҡаршылыҡтың нигеҙҙәрен емерә.

Производствола урынлашҡан эшләп сығарыуҙың иҫке нормаларын ватыу хеҙмәт өлкәһендә аңлы кешеләрҙең, Тыуған илебеҙҙең бөтә патриоттарының иң үткер тәнҡите булды.

Ижади хеҙмәт һәм батыр рәүештә фекер йөрөтеү барышында яңы кешеләр, яңы хеҙмәт революционерҙәре совет обществоһының яңы вожактары барлыҡҡа килде. Ләкин бөтә эшселәр ҙә стахановсы түгелдәр әле. Хәҙер ҙә нормаларын үтәмәүсе эшселәр күп. Тимәк, стахановсылар менән уртаса эшләүселәр араһында, алдынғылар менән артта ҡалыусылар араһында ҡаршылыҡ бар.

Шәхси өлгө күрһәтеү менән революцион тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләү, кәрәкле ваҡиғаларҙа мораль тәьҫир яһау кеүек тәнҡиттең башҡа формаларын ҡулланыу — хеҙмәт етештереүсәнлегенең үҫеш темптарын тиҙләтеү өсөн көрәштең төп юлы булып тора. Мәҫәлән, машиналар төҙөү заводының эшселәренән слесарь-лекальщик Ухов 1947 йылда 4,5 йыллыҡ норма, строгальщик Кудрявцев шул уҡ ваҡыт эсендә 3 йыллыҡ норма үтәнеләр. Электр оборудованиелары заводының токаре иптәш Федоров ике йыл эсендә 6 йыллыҡ норма үтәне. Был миҫалдар эш менән тәнҡитләү өлгөһө булып тормайҙармы ни?

Мастер Российский йәки технолог Иванов, бәлки үҙҙәре лә һиҙмәйенсәләр, хеҙмәтте ойоштороуҙың иҫкергән методтарына ҡаты тәнҡит яһаныҡлар һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ арттырыуға өлгәшер өсөн нисек итеп яңыса эшләргә кәрәклеген эш менән күрһәттеләр.

Капитализм менән сағыштырғанда үлсәп бөтөргөһөҙ юғары булған хеҙмәт етештереүсәнлегенең яңы кимәле барлыҡҡа килеүе менән генә коммунизмдең еңеүе мөмкин. Совет обществоһында хеҙмәт етештереүсәнлегенең ундай юғары кимәленә өлгәшеү мөмкин. Быға гарантия булып стахановсыларҙың ошо гүзәл патриотик

* * *
П. КОПЬЕВ,
ВКП(б) Өлкә Комитетенең лекторҙар группаһы етәксеһе.
* * *

хәрәкәте тора; был хәрәкәт хеҙмәтсән массаларҙың юғары коммунистик аңлылығына нигеҙләнә.

Коммунистар партияһы массаларҙың ҡиммәтле башланғыстарын актив рәүештә яҡлай. Стахановсылар хәрәкәтенең үҫеүенә ҡомасаулаусы хужалыҡсыларҙы һәм инженер-техник работниктарҙы партия ныҡ тәнҡитләне. Партия иҫке нормалар менән яңы мөмкинлектәр араһындағы ҡаршылыҡтарҙы хәл итергә һәм стахановсылар хәрәкәте өлгөһөн массаларҙың достояниеһе итеүгә ярҙам итә.

Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙе, йәғни күп миллионлы массаларҙың активлеген һәм ижади эшен йәйелдереү өсөн Советтарҙың мөһим органдарының береһе булып тора. Халыҡ Советтарға үҙ вәкилдәрен — депутаттарҙы һайлап, государство менән идара итеүҙә үҙенең ихтыярын тормошҡа ашыра.

Һайлаусылар һайлау алды йыйылыштарында үҙҙәренең кандидаттарына политик, хужалыҡ һәм культура эштәренең төрлө мәсьәләләре буйынса наказдар бирәләр, Советтарҙың элекке составтарының эшендә булған етешһеҙлектәрҙе ныҡ тәнҡитләйҙәр һәм ул етешһеҙлектәрҙе нисек бөтөрөргә кәңәштәр бирәләр. Был наказдар яңы һайланған Советтарҙың эш нигеҙе итеп алыналар. Ул наказдарҙы үтәмәү халыҡтың депутатҡа булған ышанысын кәметәсәк һәм шул арҡала һайлаусылар ул депутатты кире саҡырып алыуҙары мөмкин.

Шулай итеп, социалистик демократияның иң юғары тибы булған халдә, Совет хеҙмәтсәндәр массаһының инициативаһын һәм энергияһын йәйелдерә һәм уларҙы совет обществоһының актив деятелдәре итә. Айырым бюрократтарҙың, эшлекһеҙҙәрҙең һәм волокита тыуҙырыусыларҙың яраҡһыҙ эш методтарын хеҙмәтсәндәрҙең тәнҡитләүҙәре совет обществоһының уңышлы үҫешенең нигеҙе булып тора. Буржуаз обществоның хакимлек итеүсе синыфтары массаларҙың активлеген нисек кенә булһа ла сикләргә һәм уларҙы государство менән идара итеү эшенән ситләтергә тырышалар. Ә беҙҙә, Советтар, массаларҙың ижады булған халендә, бөтә политик власте үҙ ҡулдарына туплағандар.

Ләкин, тәнҡит ысын-ысындан большевистик булһын һәм хеҙмәтсәндәрҙең иң киң ҡатламын солғап алһын өсөн билдәле яҡшы шарттар кәрәк.

Беренсенән, тәнҡитте ихтирам итһендәр һәм уға большевистик мөнәсәбәттә булһындар. Тәнҡитте түҙемлелек менән тыңлау ғына етмәй, тәнҡиттә әйтелгән бөтә һүҙҙәрҙе иҫәпкә алырға һәм күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә кәрәк. Тәнҡиткә ыңғай ҡараш булғанда ғына, уға тейешенсә яҡшы яуап ҡайтарылғанда ғына, хеҙмәтсәндәр үҙҙәренең фекерҙәре менән иҫәпләшәләр икәнлегенә, уларҙың теге йәки был предприятиенең йә булмаһа учреждениеның эшен яҡшыртыуға йүнәлтелгән тәнҡиттәре тайпылышһыҙ үтәү өсөн ҡабул ителә икәнлегенә үҙ тәжрибәләрендә күреп ышанһалар, — бары тик шул саҡта ғына предприятиеләрҙең, учреждениеләрҙең һәм айырым етәкселәрҙең эштәренә массаларҙың таҙа тәнҡиттәре уңышлы рәүештә йәйелдерелә ала. Ләкин әле был ғына аҙ. Массаларҙың актив эшмәкәрлектәре һәм илдең общественный-политик тормошоноң барлыҡ өлкәләрендә уларҙың ҡатнашлыҡтары совет обществоһын һәм государство ҡоролошон артабан нығытыуҙың төп залогы һәм гарантияһы булып тора. Шулай булғас, партия беҙҙән тәнҡитте һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙе үҫтереү эшен үҙ ағышына тапшырмауҙы, уның үҫеүенә һәр яҡлап булышлыҡ күрһәтеүҙе, хеҙмәтсәндәрҙә эштәге етешһеҙлектәрҙе ҡаты тәнҡитләү һәм был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү теләген актив рәүештә үҫтереүебеҙҙе талап итә. ВКП(б) Үҙәк Комитете быныӊ өлгөһө булып тора. Ошондай бер миҫал килтерәйек: «В. Мураделиҙең «Бөйөк дуҫлыҡ» операһы тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитете ҡарары совет музыка искусствоһының ҙур хаталарын күрһәтте. Был хаталар, халыҡтан айырылған, рус һәм Көнбайыш Европа музыкаһы классиктарының ҡаҙаныштарын һанға һуҡмаусы һәм реаль тормоштан айырылған ниндәйҙер яңы бер үҫеш юлын асырға маташыуҙан тора. Был ҡарар совет музыкаһы өлкәһендә таҙа тәнҡитте үҫтереүгә ҡеүәтле этәргес бирҙе. Ул ҡарар сыҡҡанға тиклем киң ҡатлам интеллигенция, эшселәр һәм крәҫтиәндәр тарафынан ғына түгел, бәлки профессиональ музыковедтар тарафынан да музыкаға тәнҡит юҡ ине. ВКП(б) Үҙәк Комитете ҡарары тәнҡитте нисек үҫтерергә кәрәклектең һәм, тәнҡитләнә торған эш тармағын артабан үҫтереү эшендә тәнҡит ыңғай роль уйнаһын өсөн, уға нисек итеп дөрөҫ йүнәлеш бирергә кәрәклектең өлгөһө булып тора.

Ләкин тәнҡиттең ике төрлө булыуы мөмкин. Мәҫәлән, оппозиция үҙ ваҡытында партиялылыҡты емерергә маташты. Социализм эшенә дошман булған ул тәнҡит беҙҙең Тыуған илебеҙгә, беҙҙең ҡоролошҡа, беҙҙең тормошобоҙға, беҙҙең өлгәшеүҙәребеҙгә яла яғырға һәм тап төшөрөргә маташты. Ул контрреволюцион элементтарҙың тәнҡите ине. Беҙҙә әле хәҙер ҙә эшкә зарар итеү өсөн тәнҡитләргә яратыусылар аҙ түгел. Шуға күрә, большевистик тәнҡитте дошман тәнҡитенән айыра белергә кәрәк.

Беҙҙең илебеҙҙә бөтә общественный тормош, хеҙмәтсәндәрҙең профсоюз, комсомол һәм башҡалар кеүек, уңарлаған миллион кешене үҙ сафтарына алған барлыҡ массовый ойошмалары массаларҙың үҙ эшмәкәрлектәре принцибенә ҡоролған, был уларҙың эштәренә тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙе киң рәүештә урынлаштырыу мөмкинлеген бирә. Был метод массаларҙы активлаштырырға мөмкинлек бирә һәм уларҙы государство менән идара итеүгә ылыҡтыра, уларҙа государство эшенә күнегеүҙе тәрбиәләп үҫтерә, уларҙың политик, общественный һәм культура яғынан үҫеүенә булышлыҡ итә.

Тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙе үҫтереүҙең үҙләштерелгән формалары итеп производство кәңәшмәләрен, сменанан һуң үткәрелә торған «летучкаларҙы», партия, хужалыҡ, профсоюз активе һәм башҡа йыйылыштарҙы иҫәпләргә кәрәк. Унда производствоның бөтә мөһим мәсьәләләре тикшерелә һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү методтары эшләнә, насар эшләүселәр һәм артта ҡалыусылар тәнҡит ителәләр, ә был, кешеләрҙе тәрбиәләүҙең иң көслө формаһы булып тора.

Билдәле булғанынса, беҙҙең партиябыҙ практик төҙөлөш эшенең барлыҡ мәсьәләләрен матбуғат арҡыры халыҡ хөкөмөнә сығарып, матбуғатты массалар инициативаһын үҫтереүҙең иң мөһим ҡоралы итеп файҙалана. Матбуғат заводтарҙың һәм ауылдарҙың эске тормош мәсьәләләрен күтәреп сығырға тейеш, сөнки бөтәһенән дә бигерәк унда яңылыҡтар күп. Шуға күрә матбуғатта был көндәлек тормош «күберәк иғтибар, халыҡҡа белдереү, общественный тәнҡит, яраҡһыҙ эштәрҙе бөтөрөү, яҡшынан өйрәнергә саҡырыу алырға тейеш» (Ленин, Әҫәрҙәр XXIII том, 213-сө бит).

Беҙҙә был эштә үҙәк, өлкә һәм район газеталарынан тыш, заводтарҙа сығарыла торған күп тиражлы газеталар, стена газеталары, плакаттар, «молниялар», «крокодил» һымаҡ иллюстрациялы плакаттар һәм башҡалар ҙур роль уйнайҙар. Матбуғаттың был төрө иң оператив һәм көндәлек мәсьәләләрҙе шунда уҡ яҡтырта торған төрө, сөнки ул эшселәрҙең үҙ ҡулдарында, ә уның эше стахановсылар хәрәкәтен бөтә саралар менән күтәреүгә, производствола, шулай уҡ көн-күрештә иҫкергән, артта ҡалған күренештәргә ҡаршы көрәшкә йүнәлтелгән.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеологик мәсьәләләр буйынса сығарған ҡарарҙарында, әҙәби ойошмаларҙа тәнҡиттең, үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙең тупарыуы һөҙөмтәһендә, беҙҙең обществоға идея яғынан ят булған әҫәрҙәрҙең донъяға сығыуы мөмкин булды, тип әйтелә. Беҙҙең журналдарыбыҙға идея яғынан ят булған әҫәрҙәр шуға күрә үтеп инделәр, сөнки совет әҙәбиәтенең ҡайһы бер деятелдәре үҙ коллегалары менән дуҫтарса мөнәсәбәттәрен боҙорға теләмәнеләр, совет ысынбарлығын иң кискес дәрәжәлә боҙоп күрһәтеүгә әйләнгән етешһеҙлектәрҙе һылап ҡына, өндәшмәйенсә үттеләр.

ВКП(б) Үҙәк Комитете башҡорт әҙәбиәтендә лә шулай уҡ етешһеҙлектәр булыуын асты. «Башҡортостан партия ойошмаһында агитацион-массовый һәм пропаганда эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитете ҡарарында айырым тарихсыларҙың һәм әҙәбиәтселәрҙең эштәрендәге милләтселек характерындағы етешһеҙлектәр күрһәтелгәйне. Уларҙың әҫәрҙәрендә башҡорт халҡының ысын милли хәрәкәте менән башҡорт феодалдарының юлбаҫарҙарса сығыштары араһында һис бер төрлө айырма ҡуйылмаған. Улар Башҡортостанда ҡасандыр булған патриархаль-феодаль ҡоролошто идеяллаштырыуға юл ҡуйғандар. Мәҫәлән, хандар-феодалдар эпосы «Иҙүкәй менән Мораҙымды» популярлаштырыу, Алтын Орданы маҡтау. Бурангуловтың «Иҙүкәй менән Мораҙым» пьесаһында Алтын Орда ханы Туҡтамыштың мырҙаһы Иҙүкәй милли герой, революцион халыҡ юлбашсыһы итеп күрһәтелә. Хәҙерге заман темаһына яҙылған ҡайһы бер пьесаларҙа совет кешеләре тупаҫ итеп, культураһыҙ итеп, обывателдәргә хас булған ҡарашлы итеп күрһәтеләләр. Ваҡиғалар күп ваҡыт уйлап сығарылған һәм ялған итеп күрһәтеләләр. (Бикбайҙың «Тыуғандар» исемле пьесаһы).

Был серьез хаталарҙың сәбәптәре — яҙыусыларҙың марксизм-ленинизм теорияһын, хеҙмәтсәндәрҙең тормошон насар белеүҙәрендә һәм яҙыусылар араһында большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡиттең бөтөнләй булмауында.

Культура, идеология эше мәсьәләләре хәҙер бөтә общественный-политик эштең төп мәсьәләләре булып тора. Сөнки хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү бурысы бөтә халыҡтың дөйөм культура һәм политик кимәленең бик ныҡ үҫеүен, беҙҙең барлыҡ кешеләребеҙҙе юғары идеялы, социалистик аңлы, үҙ Тыуған илебеҙҙең ялҡынлы патриоты итеп тәрбиәләүҙе талап итә.

Коммунистик тәрбиә эше кешеләрҙең аңындағы капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәш мәсьәләләре менән ныҡ бәйләнгән.

«Капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәштә партия тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүҙең һыналған ҡоралын файҙаланып, общественность фекеренең утын алға табан хәрәкәт итеүебеҙгә ҡомасаулаусы иҫкелеккә ҡаршы йүнәлтә» (М. А. Суслов).

Империализм лагеры менән демократия һәм социализм лагеры араһында көрәш көндән-көн ҡыҙа барып, ер шарындағы бөтә халыҡтарҙы солғап алған ваҡытта коммунистик тәрбиә бигерәк тә ҙур әһәмиәткә эйә. Был беҙҙең алға совет халҡының рухани интерестарын һаҡлау бурысын ҡуя; «кешеләр аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын активлаштырырға һәм совет культураһына политиканан ситтә тороусылыҡ, серегән буржуаз идеология йоғонтоһонон емештәре булған идеяһыҙлыҡ, формализм индерергә һәр төрлө маташыуҙарға ҡиҫкен отпор биреп, культура ижадының юғары идеялылығын һәм боевой партиялылығын һәр ваҡыт һаҡлау бурысын ҡуя» (М. А. Суслов).

Тимәк, капитализм ҡалдыҡтарына ҡаршы көрәш ят ил буржуазияһы йоғонтоһона ҡаршы көрәш менән бергә тура килтереп алып барылырға тейеш. Тимәк, иҫкелек менән яңылыҡ араһындағы көрәштең диалектик законы совет обществоһы үҫеүенең тышҡы шарттарына ла ҡағыла. Ә бындай йоғонтоноң барлығы серей барған буржуаз культура алдында интеллигенциябыҙҙың бер иң тиклем өлөшөнөң тиҙ сүгеүе фактыларынан билдәле. Был тағы ла үткәндәгеләр ҡалдығының элементтәре һәм общественностең тәнҡит утын уларға ҡаршы йүнәлтергә кәрәк.

Коммунизм төҙөүҙең хәҙерге осоронда етештереү көстәренең юғары кимәле өсөн көрәшеү генә етмәй, коммунистик аңлылыҡтың иң юғары кимәленә өлгәшеү өсөн көрәшергә лә кәрәк. Кешеләрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү, уларҙы коммунизм идеяһына сикһеҙ бирелгәнлек рухында тәрбиәләү — хәҙер беренсе дәрәжәләге төп эш булып тора.

Шулай итеп, беҙҙә ҡаршылыҡтарҙы асыу һәм уларҙы хәл итеү стихиялы рәүештә емерелеү законы рәүешендә түгел, ә совет обществоһын үҫтереүҙең иң мөһим этәргес көсө булған большевистик тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләү рәүешендә бара.

Беҙҙең бурыс — совет обществоһындағы ҡаршылыҡтарҙың характерын, уларҙы асыу һәм хәл итеү формаларын һәм методтарын кадрҙарыбыҙҙың тәрән рәүештә аңлауҙарына өлгәшеүҙә, уларҙың үҙҙәренең көндәлек эштәрендә тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитләүгә камил эйә булыуҙарына өлгәшеүҙә. Шул саҡта ғына коммунистик обществоны артабан уңышлы рәүештә төҙөү мөмкин.

* Пропагандистарҙың республика семинарында һөйләгән лекцияның ҡыҫҡартылған стенограммаһы.

Советтар Союзында



Черкес автономиялы өлкәһе, Өлкәнең 20 йыл йәшәү осоронда Черкесск ҡалаһында бик күп матур биналар төҙөлдә.

Һүрәттә: Черкесск ҡалаһындағы связь йорто.

Г. Аракельян фотоһы (ТАСС фотохроникаһы).

ЯҢЫ КИТАПТАР

„Агитатор библиотечкаһы“

1947 йылдың ноябрендә ВКП(б) Үҙәк Комитете «Партияның Сталинград ойошмаһында агитаторҙар менән эштең етешһеҙлеге һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында» ҡарар ҡабул иткәйне.

ВКП(б) Үҙәк Комитете был ҡарарында агитаторҙарға методик ярҙам күрһәтеү һәм уларҙың эш тәжрибәләрен дөйөмләштереү өсөн 1948 йылда Госполитиздатты 14 китаптан торған «Агитатор библиотечкаһын» 500 мең дана тираж менән баҫып сығарыуға мәжбүр итте.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының ошо ҡарарына ярашлы рәүештә, Госполитиздат июнь айында «Агитатор библиотечкаһы» баҫып сығара башлаясаҡ. Был серияға түбәндәге китаптар инәсәктәр: большевистик агитацияның төп черталары; политик агитация тураһында (М. И. Калининдең сығыштарының йыйынтығы); беседаны үткәреү өсөн нисек әҙерләнергә һәм уны нисек үткәрергә; агитаторҙың газета менән эш итеүе; докладҡа нисек әҙерләнергә; агитаторҙың теле тураһында; агитация эшендә художество әҙәбиәте менән нисек файҙаланырға; агитатор һәм стена газеталары; предприятиеларҙа һәм колхоздарҙа күргәҙмә агитация, колхозда политик агитация тәжрибәһе; предприятиеларҙа политик агитация тәжрибәһе; халыҡтарҙың йәшәгән урындарына йөрөп агитация эштәрен алып барыуҙың тәжрибәләре; агитатор — социалистик ярышты ойоштороусы; агитаторҙың белешмәләре.

«Агитатор библиотечкаһы» подписка менән таратыласаҡ. Һәм уға ингән брошюралар «Когиз-ден» һәм Союзпечаттең магазиндарында һәм киоскаларында ла һатыласаҡтар.

Күмер промышленносе ветерандары өсөн йорттар

СТАЛИНО. (ТАСС). Сталино өлкәһе шахталарында ветеран горняктар: маҡтаулы шахтерҙар, тау мастерҙары, участка начальниктары һәм механиктары өсөн торлаҡ йорттар төҙөү башланды. «Куйбышевуголь», «Зуевантрацит» һәм башҡа трестарҙың шахталарында 120 йорт һалынып бөттө лә инде. Һәр бер горняктең семьяһы өсөн кухнялы һәм ике-өс бүлмәле квартира, ярҙамсы биналар, шулай уҡ йәшелсә һәм емеш баҡсаһы өсөн усадьба бирелә. Сталино ҡалаһы ситендә Петровкала шахтерҙар өсөн бер семьялыҡ 25 йорт һалына. Йыл аҙағында шахтерҙар өсөн 1.400 индивидуаль йорт төҙөләсәк.

Бетон һалыу өсөн электровибратор

ЯРОСЛАВЛЬ, (ТАСС). Ярославлдәге «Красный маяк» электромеханик заводы юлдарға бетон һалыу өсөн яңы конструкциялы юғары етештереүсәнле электровибраторҙар эшләп сығара башланы. Бындай бер машина бынға тиклем йәшәп килгән конструкциялағы өс-дүрт электровибраторҙы алыштыра. Яңы конструкциялы эшләнгән беренсе 150 машина сығарылды.

Завод биш айлыҡ программаһы срогынан алда үтәне. Ул дүрт айҙа пландан тыш 400 мең һумдан артыҡ файҙа бирҙе.

ПАРТИЯ ТОРМОШО

Партия йыйылыштарын яҡшы әҙерлек менән үткәрергә

Мин, тәжрибә менән уртаҡлашыу тәртибендә, бер йыйылышты әҙерләү, уны үткәреү һәм ҡабул ителгән ҡарарҙың үтәлешен тәьмин итеү буйынса эшләгән эшебеҙ тураһында һөйләргә теләйем.

Партия йыйылышында промыселде рентабелле һәм дотацияһыҙ эшләүгә күсереү мәсьәләһен тикшерергә кәрәк булды. Беҙ был көн тәртибен билдәләгәндә, промыселдең рентабелле эшләүен тәьмин итеү буйынса һәр бер коммунистең бурысын ентекләп аңлатыуҙы, бығаса билдәле булмаған резервтарҙы табыуҙы һәм уларҙы файҙаланыуҙы, бөтә коллективты экономия өсөн көрәшкә ойоштороуҙы төп маҡсат итеп ҡуйҙыҡ. Партия ойошмаһына рентабелле эшләүҙе тәьмин итеү сараларын билдәләргә, уларҙы тормошҡа ашырыуҙың форма һәм методтарын уйлап табырға кәрәк ине.

Йыйылышҡа әҙерләнгә беҙ партия активы менән кәңәшмә үткәреүҙән башланыҡ. Коммунистарға конкрет поручение бирелде. Стена газетаһы, «боевой листок» һәм «молнияларҙың» редакторҙарына махсус номерҙар сығарырға, коммунист Изедеровҡа эшселәрҙе рентабелле эшләүгә, накоплениеларҙы арттырыуға саҡырыусы лозунгылар яҙып эләргә, коммунист Шашинаға материалдарҙы, электр энергияһын экономиялау, инструменттарҙы һаҡсыл файҙаланыу юҡаһында алынған накоплениеларҙы күрһәтеп диаграммалар төҙөргә ҡушылды.

Көн тәртибенә ҡуйыласаҡ мәсьәләне өйрәнеү һәм йыйылышҡа әҙерләү эшенә 12 коммунист йәлеп ителде. Улар участкаларҙың һәм цехтарҙың эшенә ентекләп анализ яһанылар. Был һәр бер коммунисҡа йыйылышта ҡиммәтле тәҡдимдәр менән сығыш яһарға мөмкинлек бирҙе.

Йыйылыш билдәләнгән ваҡытта башланды. Доклад менән промысел директоры иптәш Славинский сығыш яһаны.

— Илебеҙҙең рентабелле эшләүсе предприятиеларе сафына баҫыу өсөн, — тине докладсы, — нефть сығарыуҙы арттырыу менән бергә, беҙ сығарған нефткә расходтарҙы ла кәметеүгә өлгәшергә тейешбеҙ. Бының өсөн эшсе көстәрен кәметеүгә, эштең сифатына һәм һанына ҡарап түләүгә күсергә, хужалыҡ иҫәбен ҡыйыуыраҡ индерергә, социалистик ярышты киң йәйелдереп, хеҙмәт етештереүсәнлеген ҡырҡа күтәреүгә өлгәшергә кәрәк.

Доклад буйынса сығыш яһаусы коммунистарҙан Балышканов, Давыдов, Карташов, Буланкин һәм башҡа күп кенә иптәштәр электр энергияһын экономиялы тотоноу буйынса көрәш ойоштормағандары өсөн хужалыҡ һәм профсоюз етәкселәрен ҡаты тәнҡитләнеләр. Похлебаев һәм Копылов иптәштәр башҡа күп кенә етешһеҙлектәргә туҡталдылар.

Асылған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса ҡиммәтле тәҡдимдәр индерелде. Шулар нигеҙендә йыйылыш конкрет ҡарар ҡабул итте. Һәр бер коммунист алдына аныҡ бурыс ҡуйылды. Промыселдең өлкән инженеры коммунист Травницкийға, участка мастерҙары һәм цех начальниктары менән берлектә, күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса ойоштороу-техник саралар билдәләргә ҡушылды. Партгруппоргтарға һәм профоргтарға алдынғы эшселәрҙең, бригада һәм сменаларҙың эш өлгөләрен киң популярлаштырыу бурысы йөкмәтелде. Рентабелле эшләү, государство дотацияһынан баш тартыу һәм хужалыҡ иҫәбенә күсеү тураһында эшселәр араһында доклад һәм беседалар ойоштороу планлаштырылды.

Йыйылыштан һуң уҡ, беҙ билдәләгән сараларҙы үтәү эшенә башланыҡ. Партбюро ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен нығыны контроль аҫтына алды.

Һөҙөмтә бик тиҙ күренә башланы. Өсөнсө номерле участкала станок-качалкаларҙың станиналары әлейән-әле һынып тора һәм шуға күрә уларҙы алыштырырға тура килә ине. Коммунист Иванов, партияһыҙ эшселәр менән берлектә, станок-качалка станиналарының һынған өлөшән бәләкәй диаметрлы патрубка ярҙамында йәбештереү методын ҡулландылар. Скважиналарҙың тик тороуҙары бөтөрөлдө. Был сара тик бер үҙе генә промыселгә ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 18 мең һум экономия яһарға мөмкинлек бирҙе.

Станок-качалкаларға ҡуйыла торған «юғары бармаҡтарҙы» промысел бер данаһын 15 һум менән һатып ала ине. Коммунист Кузнецов уларҙы эшләнеп ташланған һәм файҙаланылмай ятҡан плунжерҙан яһай башланы. Уның бер данаһы 5 һумға ғына төшә. Бынан промысел 16 мең һум экономия алды. Бындай миҫалдарҙы күп килтерергә мөмкин. Партия йыйылышынан һуң үткән бер ай ваҡыт эсендә 8 рационализаторлыҡ тәҡдиме индерелде. Уларҙан 35 мең һум экономия алынды. Аварияләр бөтөнләй бөтөрөлдө.

Хәҙер промысел нефть сығарыу планын айҙан-айға арттырып үтәп килә. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 7 процентҡа кәмене.

В. Назаров,
«Ишембайнефть» тресы беренсе промысел партия ойошмаһының секретаре.

Район газеталары биттәренән

Колхоздың стена газетаһы

«Ҡыҙыл туғай» колхозы эргәһендәге «Коммунизмға» стена газетаһының сыға башлауына 1948 йылдың май айында 10 йыл тулды.

Был йылдар стена газетаһы өсөн дә ҙур һәм тарихи көрәш йылдары булды. Колхозды ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан нығытыу мәсьәләләре бер ваҡытта ла уның битенән төшмәнеләр.

«Коммунизмға» газетаһы ҙур инициатива менән эшләй. Төп һәм хәл иткес мәсьәләләрҙе күтәреп сыға. Социалистик ярышты систематик яҡтырта, алдынғыларҙы күрһәтә бара. Уның тәҡдиме менән колхозда сусҡасылыҡ фермаһы ойошторолдо.

Стена газетаһы — коллектив ижад емеше ул. Редколлегия члендары быны дөрөҫ аңлағандар. Газетаны күмәк көс менән — колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар ҡатнашлығы менән сығарыуға ныҡ иғтибар итәләр. Хәҙер, газетаның даими яҙышыусы 25 хәбәрсеһе бар.

ВКП(б)-ның Краснокам райкомы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы органы — «Коммунизмға» газетаһы колхоз тормошоноң көҙгөһө булған «Коммунизмға» стена газетаһының 10 йыллығы айҡанлы, уның эшмәкәрлегенә яһаған күҙәтеүендә түбәндәгеләрҙе яҙа:

«...Стена газетаһы эше — партия ойошмаһының эше. Бына шуның өсөн дә «Ҡыҙыл туғай» колхозы эргәһендәге тәүге партия ойошмаһы секретаре иптәш Әхмеров редколлегия члендарының эштәрен ойоштороуға айырыуса иғтибар итә.

Стена газетаһының эше тураһында партия йыйылыштарында редактор иптәш Исламовтың отчет докладтарын ҡуя, бюро ултырышында айлыҡ эш пландарын раҫлай, уны партия һәм хөкүмәттең һуңғы ҡарарҙары менән таныштыра. Газетаға политик юнәлеш бирә».

Күҙәтеү — газеталар өҫтөнән партия етәкселегенең мөһим бер формаһы. Район газеталарында стена газеталарына күҙәтеүҙәрҙе йышыраҡ биреп барырға кәрәк.

Һүрәттә: Башҡортостан еләкселек станцияһының тәжрибә баҫыуында лаборанткалар Б. Левашева һәм Е. Камолина тәжрибә өсөн билдәләнгән имән ағастарын үлсәйҙәр. **В. Жданов фотоһы.**

Алдынғылар тәжрибәһе

Ғиниәт Батыров баҡсаһында

Дәүләкән районының «Ҡыҙыл Урал» колхозы үҙенең йәшелсә баҡсаһы менән инде 14-се йыл дан тота.

Үҙған йыл бында һәр гектарҙа кишер 436 центнер, сөгөлдөр 313, кәбеҫтә 356, ҡыяр 144, һуған 250, помидор 164 центнер урожай бирҙе. Бөтә культуралар буйынса һәр гектарҙан 80 урынына, 332-шәр центнер урожай алынып, план 401 процентҡа үтәлде. Йәшелсә орлоҡтары ла планға ҡарағанда дүрт тапҡырға артығыраҡ етештерелде. Государство алдында йөкләмә үтәлгәндән һуң, колхозсыларҙың хеҙмәт көндәренә 2.700 бот йәшелсә бүленде. Бынан тыш йәшелсә һәм уның орлоҡтарын һатып, 103 мең һум доход алынды.

Колхоздың йәшелсә баҡсаһы бригадаһында 10 кеше. Уның бригадиры 60 йәшлек Ғиниәт Батыров. Ул — үҙ эшенең мастеры.

— Йәшелсәнән юғары урожай алыуға мин бригада члендарының хеҙмәтен дөрөҫ ойоштороу һөҙөмтәһендә ирешәм, — ти ул.

Бөтә хеҙмәт индивидуаль сдельщина нигеҙендә алып барыла. Хеҙмәт көнө нормаларҙы үтәүгә һәм эш сифатына ҡарап яҙыла. Социалистик ярыш киң йәйелдерелгән. Баҡса майҙанында яҙғы эштәр башланғандан бирле Сафия Хәбибрахманова, Ғәзимә Мифтахова, Зөлә Батырова, Сания Насибуллина иптәштәр һәр көн нормаһы 130—140 процентҡа үтәйҙәр. Хәҙер баҡсала кишер һәм сөгөлдәр сәселде, рассадаларҙы күсереп ултыртыуға әҙерлек эше алып барыла.

Ғиниәт Батыров баҡсасылыҡ эшендә бай тәжрибәгә эйә. Ул бөтә эште агротехник талаптар нигеҙендә ойошторған. Баҡса майҙаны культураларға ҡарап, 4 баҫыуға бүленгән. Гектар иҫәбенә 15—20 тонна тиреҫ индерелгән беренсе баҫыуға тәүге йылда кәбеҫтә, икенсе йылда — гектарына 6—7 тонна серегән тиреҫ индереп, ҡыяр һәм помидор, өсөнсө йылда — кишер һәм сөгөлдөр һәм дүртенсе йылда һуған сәселә.

Иптәш Батыров культураларҙың сәсеү сроктарына айырыуса ҙур иғтибар итә. Кишерҙе көҙ йәки яҙ бик иртә сәсә. Ерҙә йылылыҡ етешеү менән үк, сөгөлдөр сәселә, һуған ултыртыла. Уларҙы орлоҡ өсөн ултыртыу шул уҡ ваҡыттарҙа үткәрелә. Кәбеҫтә рассадалары 25 май—5 июнь араларында, ҡыяр—15 майҙа, помидор—5—10 июндә түтәлдәргә күсерелеп ултыртыла.

— Календарь сроктарға ҡарап тороп булмай. Урындағы тәбиғи шарттарға иғтибар итергә кәрәк, —ти иптәш Батыров.

Йәшелсә баҡсаһын тәрбиәләү еңел эш түгел. Иптәш Батыров бригадаһы был эште бик яратып башҡара. Кишер һәм һуған сәсеүлектәре 18—20 көн шытмай ятыусан. Бригада уларҙың сығышын тиҙләтеү өсөн сәсеүлек ерен тырмата, йомшарта. Рәт араларын эшкәртә.

А. Әхмәров,
Башҡортостан баҫыусылыҡ ғилми-тикшеренеү станцияһының алдынғы тәжрибәләр таратыу бүлеге мөдире.

Был мөһим башланғысты уңышлы дауам иттерергә

Учалы район партия конференцияһында делегаттар район активының үҙ политик белемен күтәреү өҫтөндә айырыуса йомшаҡ эшләүен тәнҡитләп үткәйнеләр. Конференция район ойошмаларында эшләүсе етәксе работниктарҙан партияның тәүге ойошмаларында, колхоздарҙа, рудниктарҙа политик темаларға йышыраҡ докладтар яһауҙарын талап иткәйне. ВКП(б) райкомы конференция ҡарарын үтәү юнәлешендә байтаҡ ҡына практик саралар күрҙе.

Райкомдың парткабинеты эргәһендә район активы өсөн киске мәктәп ойошторолдо. Был мәктәптә район Советы исполкомы бүлектәренең мөдирҙәре, райком инструкторҙары, район учреждениеларе етәкселәренән 25 коммунист уҡыны. Етәкселеккә һуңғы һайлауҙар ваҡытында килгән йәш коммунистар өсөн был мәктәптең әһәмиәте бик ҙур булды. Бында уҡыусылар ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын ныҡлап өйрәнеү менән бергә, партия һәм совет төҙөлөшө, халыҡ-ара хәл, СССР географияһы буйынса лекциялар тыңланылар. Лекцияларҙы райком секретарҙары, райкомдың бүлек мөдирҙәре уҡынылар.

Киске мәктәпте уңышлы тамамлап сығыусы 21 кеше араһында Волков, Абсаттаров, Большаков, Әхмәтшин, Тәхбәтуллин иптәштәр айырыуса яҡшы уҡыу өлгөләре күрһәттеләр. Был иптәштәрҙең теоретик белемгә эйә булыуҙары уларҙың практик эштәрендә лә күҙгә күренерлек һиҙелеш яһау менән билдәләнде.

Бынан тыш, шул уҡ парткабинет эргәһендә даими семинар эшләп килә. Был семинарҙа үткән йыл ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын түңәрәктәрҙә өйрәнгән иптәштәр йөрөй. Улар хәҙер марксизм-ленинизм классиктарының әҫәрҙәрен өйрәнеп, үҙҙәренең идея кимәлдәрен күтәрәләр. Райондың киске мәктәбен тамамлап, даими хәрәкәт итеүсе семинарға йөрөүсе иптәштәр, партияның тәүге ойошмаларында, колхоздарҙа, рудниктарҙа политик докладтар менән сығыш яһайҙар.

Ләкин район конференцияһы ҡарарын үтәү юнәлешендә ирешелгән был уңыштар башҡараһы бурыстарҙың бик аҙ өлөшөн генә тәшкил итәләр. Район активының үҙ белемен күтәреү өҫтөндә серьеҙ эш башлап ебәреүе, ул ошо бурысты большевиктарса үтәү юлында беренсе аҙымы ғына әле. Районда яуаплы эш алып барыусы иптәштәрҙең байтаҡ өлөшө бындай серьеҙ эштән ситтә тора.

Мәҫәлән, киске уҡыуҙарға йөрөргә тейешле булған коммунист иптәш Әхмәтов (халыҡ следователе) үҙенең политик белемен күтәреү өҫтөндә насар эшләй. Политик уҡыуға йөрөмәй. Шуға күрә уның эше лә насар бара. Ул райондағы законһыҙлыҡтарға, енәйәтсел элементтарға ҡаршы йомшаҡ көрәшә. Район заготконторыһында эшләгән коммунист Сәлихов тураһында ла шундай уҡ һығымта яһарға тура килә.

Район үҙәгенән ситтә тороусы, ләкин райондың төп активын тәшкил итеүсе колхоз председателдәрен, ауыл Советы председателдәрен, партияның тәүге ойошмалары секретарҙарын уҡытыу эше айырыуса йомшаҡ ҡуйылған. Колхоз председателдәре булып бик түбән әҙерлекле, аҙ белемле иптәштәр эшләйҙәр. Бындай иптәштәргә большевиктар партияһының теорияһын өйрәнеүҙә ярҙам күрһәтеү теләге менән быйыл ай һайын берәр тапҡыр семинар үткәрелде. Ләкин, был семинарҙарға йәлеп ителергә тейешле булған ауыл активының бер өлөшө ни өсөндөр бөтөнләй саҡырылманы.

М. Хәйҙәров.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Күсмә библиотекалар

Миәкә район библиотекаһы баҫыу эштәре ваҡытында колхозсыларҙы, тракторсыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн 39 күсмә библиотека ойошторҙо.

Был эшкә билдәләнгән иптәштәр көн аралаш баҫыу станларында, тракторҙар бригадаларында булалар. Китаптарҙы алыштырып торалар.

(«За высокий урожай» газетаһы).

ЕЛ ДВИГАТЕЛЕ

Һаҡмар совхозының 5-се номерле фермаһында ел двигателе ҡоролдо. Уның көсө менән малсылыҡ базалары, эшселәр өйҙәре электр менән яҡтыртыласаҡ.

(Абзан районы «Сталинсе» газетаһы).

Геройҙың дуҫтары

Үҙған йылда Ғиниәт Насиров звеноһы тирә-яҡтарҙа күрелмәгән юғары урожай үҫтереп алһа ла, звеновод, әле йәшенең балалыҡ сырайы ла китеп бөтмәгән баҫынҡы егеткә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелеүенә ауыл йәштәренең бик күптәре ышаныр етмәйҙәр ине. Ышанһалар ҙа, Ғиниәттең күкрәгенә Ленин орденә, «Ураҡ һәм сүкеш» алтын медале тағып йөрөүен күҙ алдына килтерә алмайҙар ине. Ә шул көн килде — әле һабанға төшер алдынан ғына СССР Верховный Советы Президиумының Указы иғлан ителде һәм Башҡортостан игенселәре араһындағы 11 геройҙың береһе—йәш яғынан иң йәше Ғиниәт Насиров булып сыҡты.

Баҫыу эшсеһенең хеҙмәтен шул тиклем юғары баһалауҙы күргән йәштәр бер ваҡытта ла булмаған дәрт, ялҡынлы теләк менән эшкә тотондолар быйылғы яҙҙа. Хәҙер бына Насировтың батырлыҡтары тураһында кемгә генә һөйләһәң дә, уның үҙе кеүек тырыш һәм тәүәккәл дуҫтарын — иптәштәрен маҡтау һүҙенән ситтә ҡалдыра алмайһың инде. Улар бергә, бер кеше кеүек эшләйҙәр һәм хеҙмәттә тыуған дуҫлыҡтың изге девизын юғары тоталар: беребеҙ — бөтәбеҙ өсөн, бөтәбеҙ—беребеҙ өсөн!

Звенолағы берҙән-бер оло кеше —Ғүмәр бабай Исчурин, тәжрибәһе һәм ялҡынлы кәңәштәре менән ҙур ышаныс һәм хөрмәт ҡаҙанған карт, ике һүҙҙең береһендә әйтеп килә тора:

— Беҙҙең егеттәр шикелле сәмле егеттәрҙе, беҙҙең ҡыҙҙар шикелле уңған ҡыҙҙарҙы көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың. Елкенеп, емертерлек эшләйҙәр бит. Таң йоҡоһо тигәнде лә, арыу-талыуҙы ла белмәйҙәр. Ул көстө ҡайҙан алалар, — һис әйтә алмаҫһың.

Йәштәрҙе батыр хеҙмәткә рухландырған көстөң нисек тыуыуын, йылабыраҡ һөйләшеп ултырғанда, Ғүмәр бабай үҙе уҡ әйтеп бирә. Колхоз төҙөлгән осорҙа ғына тыуған тапҡыр ҡояш күргән, баҫыуҙарға килгән тәүге машина моторҙары гөрләүен тыңлап йөрәк елкеткән балалар инде улар. Уҡыу йәшендә саҡта уҡ уларҙың бер аяҡтары мәктәптә булһа, икенсе аяҡтары баҫыуҙа булды. Ватан һуғышының ауыр йылдарында атайҙары, ағайҙары фронтҡа киткәс, колхоз эшенең бөтә ауырлығын үҙ елкәләренә алдылар.

Берлек өҫтөнә еңеү байрағы эленгән яҙҙа Ғиниәт Насиров Алтай крайы игенселәренең өлгөһө буйынса, юғары урожай звеноһы төҙөүҙең колхоз өсөн иң тиклем яҡшы буласағы тураһында үҙенең дуҫтары менән һөйләште. Был фекерҙе яҡларлыҡ кешеләр күп түгел ине әле. Бары тик бер йылдан һуң ғына колхоздың яңы председателе коммунист Уйылданов йәштәрҙең тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыу өсөн етерлек шарттар тыуҙырҙы: Насиров етәкселек иткән звеноға ер участкаһы, инвентарҙар, тартыу көстәре бүлеп бирелде.

Тағы ла бер йылдан һуң — ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙары иғлан ителгән яҙҙа, комсомолка Үҙәнбаева звено төҙөп, Насиров менән ярышҡа сыҡты. Йәшлек дәрте, оло маҡсатҡа ынтылыш күрһәтеп, ҡанатланып эшләнеләр ауылдың йәштәре — комсомолецтары һәм улар бөтә район игенселәре араһында еңеүсе булып сыҡтылар.

Хәҙер, яҙғы сәсеүҙең иң ҡыҙыу ваҡытында, звенолар эшләгән баҫыуға ҡай ваҡытта ғына барып сыҡһаң да, үҙ көстәренә, аҙымдарына торған ышаныс менән һабан һөрөүсе, йәки аттарын һай-һайлап ҡыуалап ер тырматыусы егеттәрҙе һәм ҡыҙҙарҙы күреп һоҡланаһың. Уларҙың бөтәһе лә тип әйтерлек 17—19 йәштән уҙмағандар әле. Егеттәрҙең береһе лә һалдат һурпаһын татымаған, ҡыҙҙарҙың күбеһе алдағы көҙгә генә үҙ егеттәренең кәләштәре булырға ниәт итеп йөрөүселәрҙер... Ләкин йөҙҙәрендәге етдилек һәм эшлеклелек уларҙың бөтә иғтибары бары тик бөгөнгө эште еренә еткереп башҡарып сығырға юнәлтелгән булыуы тураһында ғына һөйләй. Төшкө ашҡа туҡталған арала үҙған йылғы уңыштары тураһында һорашһыра башлаһаң, Ғиниәт Насиров, үҙенең дуҫтарына ҡаш аҫтынан ғына ҡарап ала ла, шунда уҡ бөгөнгө эштәрен һөйләп китә.

Мәүлетдин Мәғәфуров, герой звеноһындағы иң сая егет, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене кавалеры, һүҙе сыҡҡан һайын быйыл яҙ арыш ужымын үҙе тырматыуы, ҡош тиҙәге ҡатыш көл менән ашландырыу уҙғарғанда үҙенең беренселекте алыуы тураһында әйтергә ярата.

— Ә нигә әле ер һөрөүҙә лә норманы арттырып үтәүең тураһында һөйләмәйһең? — тиҙәр уға. Дуҫтарса шаяртып көләләр.

Мәүлетдин әле маҡтанырға иртә икәнлеген күрһәтә торған ике сәбәп килтерә:

— Сәскән бойҙайҙың шытып сыҡҡанын күргәс, эшең менән маҡтанырға булыр. Ә арыш ул күпереп үҫеп килә инде, — гектарынан 32-шәр центнер аласаҡҡа шик тә юҡ. Быныһы — бер, — ти ул һәм хәйләкәр йылмайып Мөнәүәрә Ғәзелшинаның ҡоңғор күҙҙәренә текәлеп ҡарап тора.—Икенсеһе... бына Мөнәүәрә апай кисә миңән артығыраҡ һөрөп, үҙемде хурлыҡҡа ҡалдырҙы бит әле. Иртәгә тағы ла шулай уҙып китмәҫ, тип кем ышанаһың уға!

Ҡыҙҙар рәхәтләнеп көләләр:

— Егеттәрҙән ҡалышып тороп булмаҫ инде!

Звенола эш өс һабан һәм өс пар тырма менән алып барыла. Звеновод уларҙың һәр ҡайһыһына иртән махсус участка бүлеп бирә, кис тикшереп, үлсәп һығымта яһай. Һөрөүселәр ҙә, тырмасылар ҙа орденлар һәм медалдар менән наградланған кешеләр. Береһен маҡтап, икенсеһен хурлаҡлыҡ урын ҡалдырырлыҡ итеп эшләмәйҙәр. Күрше участкаларҙа көр тауыш менән ат ҡыуыусы ҡыҙҙар һәм егеттәр араһында көн һайын бер ҡараңғынан икенсе ҡараңғыға тиклем ярыш бара. Ер буйы бөтәһе өсөн дә бер тигеҙ оҙонлоҡта булғас, һәр кемдең нисә метрға алданыраҡ барыуына һәм артыҡ түңәрәк яһауына тиклем бөтәһенә лә күренеп тора.

Звено 16 гектар арыштың һәр гектарынан 32 центнер урожай алырға һүҙ биргән булһа, 10 гектар бойҙайҙың һәр гектарынан 31-әр центнер иген үҫтереү өсөн көрәшә. Үҙҙәре ат һәм үгеҙҙәр менән һөрөп, тырматып, үҙҙәре сәсеп, бойҙай участкаһында эште биш көн эсендә тамамланылар. Әле шундай уҡ дәрт, шундай уҡ берҙәмлек менән арпа һәм һоло сәселәсәк ерҙе эшкәртәләр. Звено быйыл 68 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культураларын сәсә. Шул уҡ үҙған йылдағы көстәр менән ике тапҡырға артығыраҡ майҙанда эш алып барыла. Ике тапҡыр артығыраҡ көс һалырға тура килә. Ләкин герой звеноһындағы йәштәр эштең күләменә ҡарап бер генә метр ерҙең дә насар сифатлы эшкәртелеүенә юл ҡуймайҙар. Мәүлетдин Мәғәфуров та, Хәкимә Мораҙбулатова, Бәдерниса һәм Мөнәүәрә Ғәзелшиналар ҙа, — звено члендарының бөтәһе лә бик яҡшы беләләр: һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе бер генә көнгә лә һуңлатырға ярамай!

Ғиниәт Насиров звеноһы менән күрше участкаларҙа — ҡаршы тау битләүендә быйыл Ленин ордене менән наградланған Нурия Үҙәнбаева звеноһының комсомолецтары бойҙайҙың һуңғы гектарҙарын сәсәләр. Ундағы егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың да орден йәки медаль алмағандары юҡ. Улар ҙа — геройҙың һәм үҙҙәренең звеноводы комсомолка Үҙәнбаеваның даны менән ғорурланалар, юғары наградаға лайыҡ эш күрһәтеү өсөн тырышалар.

Ер өҫтөндә иртәнге яҡтылыҡ йәйелгәндә ҡайһы звено йәштәренең алданыраҡ уянып эшкә тотоноуҙарын әйтеүе лә ҡыйын. Һәр таң һайын бер-береһенән уҙҙырырға тырышып, яҙ ҡоштарын да һоҡландырырлыҡ йырҙар йырлай-йырлай ат егәләр улар. Киске эңерҙә генә баҫыу станларына әйләнеп ҡайталар. Шунда ла йәштәр, тынғылыҡ тапмайынса, бәхәсләшеп киталар.

— Кем звеноһы күберәк урожай алыр?

— Әлбиттә, беҙҙеке — Насировтыҡы!

— Юҡ! Беҙҙеке — Үҙәнбаеваныҡы!

— Себеште көҙ көнө һанайҙар.

— Улай тип әйтмәгеҙ. Әгәр ҙә Үҙәнбаева быйыл урожайҙы Насировтан күберәк алмаһа, уға кейәүгә сыҡмайым, тип әйтә, ти бит.

— Вәғәҙә бирештеләр бит инде!

— Вәғәҙәнең шарттарын да үтәргә кәрәк та баһа!

Был егеттәрҙең һәм ҡыҙҙарҙың Ватан алдында, үҙ намыҫтары һәм ялҡынлы йәшлек мөхәббәте хаҡына биргән изге вәғәҙәләрендә тороуҙарына ышанырға мөмкин. Игенсе батырҙарҙың туйы шатлыҡлы урожай байрамында булыр.

Г. Әхмәтшин.
(Махсус хәбәрсебеҙ).
Баймаҡ районы,
Карл Маркс исемендәге колхоз.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһы 10-сы номерлы урта мәктәптең унынсы класы отличниктәре А. Шадрин, В. Шульпин, А. Захаров һәм П. Зыкин.

Х. Биккулов фотоһы.

Государство заемдары облигацияларын алыштырыуҙы ҙур ойошҡанлыҡ менән үткәрергә

СССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының аҡса реформаһы үткәреү һәм азыҡ-түлеккә, промышленность тауарҙарына карточка системаһын бөтөрөү тураһындағы ҡарарына ярашлы рәүештә Мәскәү, Ленинград, Киев, Харьков һәм башҡа ҙур ҡалаларҙа государство заемдарының облигацияларын алыштырыу эше бынан бер нисә көн элек башланғайны. Был эш беҙҙең республикабыҙҙа СССР Союзы Финанс Министрствоһының графигы буйынса 25 майҙа башланды.

Государство заемына конверсия үткәреү аҡса реформаһының айырылмаҫ өлөшө булып тора. [illegible]

[illegible]

Я. Бәҙретдинов.

Ҡырмыҫҡалы районында экзамендәр һәм һынауҙар

ҠЫРМЫҪҠАЛЫ. (Телефон аша). Мәғариф бүлеге районның күпселек мәктәптәрендә экзамендәр һәм һынауҙар уңышлы барыуы тураһында хәбәр итә. [illegible]

[illegible]

Балыҡ үрсетеү

Башҡортостан йылғаларға, күлдәргә һәм быуаларға бай. [illegible]

[illegible]

Р. Ғүмәров.

Тракторҙарға запас частәр

Өфө яңы машиналары заводы (директоры иптәш Ракитин) [illegible]

[illegible] ... ынына, өс мең дана ҡыҫҡыуыр эшләп сығарҙы.

Завод коллективе запас частәр етештереүҙең йыллыҡ заданиеһын беренсе августа тамамларға йөкләмә алды.

Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата сит ил матбуғатының откликтәре

АНГЛИЯ

ЛОНДОН, 23 май (ТАСС). Лондондың бөтә газеталары Америка-Совет мөнәсәбәттәре тураһында АҠШ государство департаментенең белдереүенә ҡарата ТАСС-тың белдереүен беренсе биттәрҙә баҫып сығарҙылар. [illegible]

[illegible]

ЛОНДОН, 23 май (ТАСС). Лондон радиоһы үҙенең күп һандағы тапшырыуҙарында Совет-Америка мөнәсәбәттәре тураһында ТАСС-тың белдереүен иғлан итте. [illegible]

[illegible]

ФРАНЦИЯ

ПАРИЖ, 23 май (ТАСС). Париж радиоһы үҙенең беренсе тапшырыуында АҠШ государстве департаментенең 19 майҙағы әсәмә белдереүенә яуап итеп ТАСС-тың яһаған белдереүен баҫып тапшырҙы. [illegible]

ПОЛЬША

ВАРШАВА, 23 май (ТАСС). Польшаның бөтә газеталары АҠШ государство департаментенең белдереүе айҡанлы сит илдә киң таралған ... [illegible]

[illegible]

ШВЕЙЦАРИЯ

БЕРН, 23 май (ТАСС). Швейцария радиоһы АҠШ государстве департаментенең белдереүенә комментарийҙар биреүсе ТАСС-тың белдереүен тулыһынса тапшырҙы. [illegible]

... милләттәр ойошмаһының Генеральный Ассамблеяһы тарафынан 1946 йылдың декабрендә бер тауыштан ҡабул ителгән ҡарарға ҡарамаҫтан АҠШ-тың ошо ҡарарға ҡарата юнәлтелгән позицияһы һөҙөмтәһендә был ҡарар тормошҡа ашырылмай, тип күрһәтә». «Америка хөкүмәте ҡоралланыуҙарҙы арттырыу политикаһын үткәрә. Шуның арҡаһында, әгәр ҙә Америка Ҡушма Штаттары Ялта һәм Потсдам ҡарарҙарын үтәгән булһалар, Германия мәсьәләһе күптән хәл ителгән булыр ине инде, тип әйтелә. Вашингтон хөкүмәте шулай уҡ Япония һәм Корея мәсьәләләренең әлегә тиклем хәл ителмәүе өсөн яуаплы булып тора. Шуның менән Мәскәү радиоһы, Америка Ҡушма Штаттары башҡа илдәрҙең эске эштәренә тығылалар һәм уларға баҫым яһайҙар, тип айырыуса билдәләне. Советтар Союзына ҡарата Ҡушма Штаттар политик һәм экономик дискриминация үткәрәләр».

«Ошо фактылар йөҙөндә, тип әйтелә ТАСС-тың белдереүендә, Совет-Америка мөнәсәбәттәренең хәҙерге хәле өсөн кем яуаплы булып торғанлығы күренә».

ШВЕЦИЯ

СТОКГОЛЬМ, 23 май. (ТАСС). Стокгольмдең йәкшәмбе көнгө бөтә газеталары Совет-Америка мөнәсәбәттәре тураһында ТАСС-тың белдереүен иғлан итте. «Свенска Дагбладет» газетаһы «Советтар Союзы ғәйепләй» тигән баш менән ТАСС-тың белдереүен иғлан итте. Бында «АҠШ яңы немец агрессияһына мөмкинлек тыуҙыра», тип әйтелә. «Дагенс нюхетер» газетаһы был белдереүҙе «Мәскәү АҠШ-ты агрессия политика үткәреүҙә ғәйепләй» тигән баш менән бирҙе. «Стокгольмстиднинген» газетаһы ТАСС-тың ошо белдереүен «Мәскәү Вашингтондың белдереүен пунктлап яҡтырта» тигән баш менән баҫып сығарҙы.

Элекке король Михайҙы Румыния граждандығынан мәхрүм итеү

БУХАРЕСТ, 22 май. (ТАСС). Министрҙар Советы элекке король Михайҙың һәм элекке король семьяһының мөлкәтен государство мөлкәтенә күсереү тураһында ҡарар сығарҙы. [illegible]

[illegible] ... Румыния халыҡ республикаһына ҡаршы эш иткәндәре өсөн Румыния граждандығынан мәхрүм итеү тураһында ҡарар сығарҙы.

РЕЙТЕР АГЕНТСТВОҺЫНЫҢ ТЕГЕРАНДАҒЫ ХӘБӘРСЕҺЕНЕҢ ЯЛҒАН ХӘБӘРЕ

ТАВРИЗ, 24 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Тегерандағы хәбәрсеһенең, имеш 15 майҙа Әзербайжан сигенә Иран сик буйы ... [illegible] ... тип ошо көндәрҙә яһаған белдереүек урындағы общественный кругтар ғәжәпләнеү менән ишеттеләр. Ирак хәрби кругтарының белдереүенә һылтанып, был хәбәрсе, имеш 40 кешенән торған рустар группа... [illegible]

[illegible]

ПАЛЕСТИНАЛАҒЫ ҺУҒЫШ ХӘРӘКӘТТӘРЕНӘ ҠАРАТА

ЛОНДОН, 24 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Бағдадтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, унда бөгөн, ғәрәп армиялары Палестинала һуғыш хәрәкәттәрен дауам иттерәсәктәр һәм барлыҡ еврей көстәренең һис һүҙһеҙ капитуляция яһауҙарына ғына «риза буласаҡтар» тип официаль рәүештә белдерелгән. Ғәрәптәр һуғыш хәрәкәтен туҡтатыу тураһында Иминлек Советының һорауын иғтибарға алмаясаҡтар.

ХРОНИКА

РСФСР Верховный Советы Президиумы Михаил Васильевич Басов иптәште РСФСР Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары һәм РСФСР Государство план комиссияһының председателе итеп билдәләне.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Торлаҡтарҙы яҡшы төҙөргә

Сталинсе яңы биш йыллыҡта Башҡортостан республикаһында 600 мең квадрат метрҙан артыҡ государство торлаҡ фонды төҙөлеп, эксплоатацияға бирелергә тейеш. Бынан тыш государствонан кредит алыу юлы менән 300 мең квадрат метр күләмендә индивидуаль йорттар төҙөлә.

Ағымдағы йылда торлаҡ төҙөлешенә айырыуса ҙур әһәмиәт бирелә, уны планлаштырыуға күп яңылыҡ индерелде. БАССР Министрҙар Советы Октябрьск, Черниковск, Белорет ҡалаларында төҙөлеш эштәренең 15—20 йыл перспективаһында булған генеральный пландарын раҫланы. Өфө, Стәрлетамаҡ ҡалаларының һәм күп кенә посёлкаларҙың генеральный пландарын төҙөү тамамлана.

Ләкин төҙөлеш эштәренең асыҡ пландары, перспективалары булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы практик үтәү республикабыҙҙа һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. 1947 йылда торлаҡ төҙөлеше, промышленность төҙөлешенә ҡарағанда, үҙенең һаны һәм сифаты яғынан артта ҡалып килде. Айырым торлаҡ объекттары унарлаған йылдар буйына баланстан балансҡа күсеп йөрөй.

Промышленность һәм төҙөлеш ойошмалары, торлаҡтарға ҙур ихтыяж булыуға ҡарамаҫтан, яңы торлаҡтарҙы эксплоатацияға бирeү планын үтәмәйҙәр, сбарелгән средстволар файҙаланылмай ҡалалар. Мәҫәлән, республиканың төп алты ҡалаһы—Өфө, Белорет, Черниковск, Ишембай, Октябрьск һәм Стәрлетамаҡ ҡалалары буйынса уҙған йылда торлаҡ төҙөлешенә сбарелгән 86.977 мең һум капитал һалыуҙың 31.115 мең һумы, йәғни 35 проценте генә үҙләштерелде.

Төҙөлеш эштәренең бөтөнләй йомшаҡ барыуы менән бергә уларҙың сифаты ла сиктән тыш түбән. Бигерәк тә, Октябрьск ҡалаһындағы төҙөлештәр тураһында әйтергә кәрәк. Бында генеральный план менән билдәләнгән тәртип һаҡланмай, тышҡы архитектура оформлениеһе түбән.

Аҙ ҡатлы йорттар һалыу һуғыштан һуңғы осорҙа торлаҡ төҙөү эштәренең үҙенсәлеге булып тора. Был, урындағы материалдарҙы киң ҡулланыуға мөмкинлек бирә һәм эксплоатацияға тапшырыу срогын ҡыҫҡарта. Ләкин төҙөүсе ойошмалар архитектура, төҙөкләндереү талаптарына (юллар эшләү, йәшелләндереү, инженер-техник оборудованиелар) иғтибар итмәйҙәр. Хатта ҡалаларҙағы тотош кварталдар төҙөкләндереү ҡағиҙәләрен һаҡланмай төҙөләләр. Ишембай, Октябрьск ҡалаларында уларҙың йорттарҙы тротуар, водопровод, канализация эшләнмәй тороп, эксплоатацияға тапшырҙылар.

Торлаҡ төҙөлешенең сифатын яҡшыртыуҙа типовой проекттарҙы индереү ҙур әһәмиәткә эйә. Ул төҙөлештең үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙе һәм конструкцияның йыйнаҡ булыуын тәьмин итә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, айырым төҙөлеш һәм проект төҙөүсе ойошмалар ярaҡһыҙ позицияла торалар, типовой проекттарҙы ҡулланыуға тотҡарлыҡ яһайҙар.

Ҡайһы бер урындарҙа йорттар кварталдың контурына эйәреп, шаблон рәүештә төҙөләләр. Кварталдарҙың эсендә бер нәмә лә эшләнмәгән буш майҙандар килеп тыуа. Улар ҙур булыуҙары арҡаһында төҙөкләндереүгә лә уңайһыҙ.

Айырым фасадтарҙың матур булыуы массовый торлаҡ, бигерәк тә, аҙ ҡатлы йорттар төҙөлешендә архитектура мәсьәләһен хәл итеп етмәй әле. Бында район, посёлка, кварталдар төҙөлешә проекттарының яҡшы сифатлы булыуы ҙур урын тота. Шулай ҙа ҡайһы бер айырым архитекторҙар фасадтарҙың бай булыуы һәм матурлығы артыҡ ҡыуып, материалдың күп тотолоуына юл ҡуялар. Һөҙөмтәлә, экономия урынына, киреһенсә артыҡ расход тотола.

Ҡалаларҙа урынлашҡан күпселек предприятиеларҙың етәкселәре торлаҡ йорттарын предприятиеға яҡын урында төҙөүҙе талап итәләр. Был боҙоҡ һәм ведомство практикаһы. Уның һөҙөмтәһендә бер-береһенән айырылып торған, бүлгәләнгән посёлкалар килеп тыуа, төҙөкләндереү эшенә тотҡарлыҡ яһала. Кәрәкле урындарҙа мәктәптәр, магазиндар, аптека, мунса һәм башҡа предприятие, ойошмалар төҙөлмәй ҡала. Былар бөтәһе лә индивидуаль төҙөлеш урындарын бөтә төр төҙөкләндереү һәм хеҙмәтләндереү яғынан тәьмин итеү, төҙөлештәрҙә йәшәп килгән етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөү кәрәклеге тураһында һөйләйҙәр.

Ҡалаларҙы, посёлкаларҙы яҡшы сифатлы, культуралы һәм тәртипле итеп төҙөүҙә хеҙмәтсәндәр депутаттары Советтарының исполкомдарына һәм государственный төҙөлеш контроле органдарына айырыуса яуаплылыҡ йөкмәтелгән. Беренсе нәүбәттә улар үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы дөрөҫ тормошҡа ашырыу өсөн көрәшергә һәм төҙөлештәр өҫтөнән даими контролде тәьмин итергә тейештәр.

М. Сәхәүетдинова,

БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге архитектура эштәре Управлениеһы начальнигы.

ГОСУДАРСТВО СТРАХОВАНИЕҺЕ

колхоздарҙа стихиялы бәлә-ҡазалар һөҙөмтәһендә килеп тыуған зыяндарҙы түләүҙе ТӘЬМИН ИТӘ.

КОЛХОЗДАР боҙ яуыу, көслө ямғырҙар, дауылдар һәм башҡа стихиялы бәлә-ҡазаларҙан һәләк булыу ваҡиғаһынан сәсеүлектәрҙе, шулай уҡ емеш-еләк баҡсалары һәм виноград баҡсалары урожайын ирекле рәүештә СТРАХОВАТЬ ИТӘ АЛАЛАР.

Страхование төҙөү өсөн Госстрахтың район инспекцияларына мөрәжәғәт итегеҙ.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00150. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 105
28
май
йома

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Сәсеү планын һәр бер колхоз, совхоз үтәргә һәм арттырып үтәргә бурыслы. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Р. Әхмәдиев. — Трактор агрегаттарында политик-массовый эш. (2-се бит).
Советтәр Союзында. (2-се бит).
Израиль государство сит ил эштәре министре менән СССР Сит ил Эштәре Министре араһында телеграммалар алышыу. (2-се бит).
Н. Матюшкин. — Рус халҡы — илебеҙ халыҡтары араһында етәксе көс. (2-се бит).
Коллектив договор — планды үтәү өсөн көрәштә мөһим ҡорал. (3-сө бит).
Республикабыҙҙың башҡалаһын төҙөк һәм матур ҡала итәйек! (3-сө бит).
Н. Руднев. — Көҙгө сәсеү өсөн ерҙе ваҡытында әҙерләргә. (3-сө бит).
В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу алдынан. (3—4-се биттәр).
М. Кауркина. — Йәйге һауыҡтырыу эштәренә әҙерлек. (4-се бит).
Совет-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата сит ил матбуғатының откликтәре. (4-се бит).

Халыҡ өсөн лекциялар һәм докладтар

Илебеҙҙә коммунизм төҙөү осоронда хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһын коммунистик рухта тәрбиәләү — большевиктәр партияһының һәм Совет государствоһының иң мөһим бурысы булып тора. Һуғыштан һуңғы сталинсә биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылының бөйөк программаһын үтәү өсөн бөтә халыҡты фидакәр хеҙмәткә рухландырыу бурысы массовый-политик эште киң йәйелдереүҙе талап итә.

Киң ҡатлам халыҡ араһында массовый-политик эш алып барыуҙа лекцион пропаганда иң мөһим урын тота. Иптәш Сталин партияның XVIII съезында һөйләгән докладында «партияның иғтибарын матбуғатта пропаганда алып барыуға һәм пропаганданың лекцион системаһын ойоштороуға тупларға» тине.

Халыҡты фәнни ағартыу, уның политик аңын күтәреү тураһында большевиктәр партияһы һәм Совет Хөкүмәте даими хәстәрлек күрәләр. Шуның өсөн дә хеҙмәтсәндәрҙең киң ҡатламы араһында лекциялар һәм докладтар аша пропаганда эше алып барыу киң ҡолас алды. Политик, экономик, фәнни һәм культура-ағартыу темаларына ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа бик күп һанда лекциялар һәм докладтар һөйләнә. Партия һәм совет работниктәре, илебеҙҙең алдынғы интеллигенцияһы массаны ағартыу, фәндең һәм техниканың өлгәшеүҙәрен массаға еткереү өсөн ғәйәт ҙур көс һалалар.

Республикабыҙҙың ҡалаларында һәм ауылдарында халыҡ өсөн лекциялар һәм докладтар уҡыу эше байтаҡ яҡшырҙы. ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете лекторҙары быйыл ҡала хеҙмәтсәндәре өсөн 373 лекция һәм доклад һөйләнеләр һәм уларҙы 46600 кеше тыңланы.

Туймазы район Советы культура-ағартыу эштәре бүлегенең лекторҙары апрель айында ғына 182 лекция уҡынылар, уларҙың 148-е башҡорт һәм татар телендә. Бөрө район Советы культура-ағартыу эштәре бүлегенең лекторҙары 75 кешенән тора. Улар 1948 йылдың беренсе кварталында тәбиғәт-фәнни темаларға 88, ауыл хужалығы темаларына 215, общественный-политик темаларға 113, медицина темаларына 66 лекция уҡынылар.

Ләкин был өлкәлә эшләһе эштәр күп әле. Республикабыҙҙың күп кенә райондарында ВКП(б) райкомдары, төрлө партия ойошмалары етәкселәренең, район Советтәренең культура-ағартыу эштәре бүлектәре работниктәренең лекцион пропаганда эшен ойоштороуға тейешле иғтибар бирмәүҙәре сәбәпле халыҡ өсөн лекциялар һәм докладтар һирәк була. Стәрлетамаҡ районында 1948 йылда ауыл хужалығы темаларына ни бары 11 лекция уҡылған. Благовар райкомының 40 докладсыһының 28-е быйыл бөтөнләй доклад менән сығыш яһамаған. Миәкә, Бишбүләк, Шишмә, Шаран, Дүртөйлө, Ҡандра, Абзан, Зианчура райондарында ла лекцион пропаганда бик насар тора.

Лекция һәм докладтар ойоштороу эшендә ҙур етешһеҙлектәр бар. Күп урындарҙа лекцияларҙың һәм докладтарҙың идея-теоретик кимәле түбән. Хәҙерге момент тураһындағы лекцияларҙа илебеҙҙең эске тормошо аҙ яҡтыртыла. Лекторҙар партия ойошмаларының бөгөнгө көндә хәл ителә торған бурыстарын аҙ беләләр һәм тыңлаусыларҙың иғтибарын был бурыстарҙы тормошҡа ашырыуға йүнәлдермәйҙәр.

Идеология мәсьәләләре буйынса ла лекциялар һәм докладтар бик һирәк була. Биш йыллыҡ пландың бурыстары һәм уларҙың үтәлеше тураһында халыҡҡа аҙ аңлатыла. Лекция уҡыу эшенә агрономдар, врачтар аҙ йәлеп ителгән, шуның өсөн дә халыҡ араһында агрономия темаларына һәм һаулыҡ һаҡлау мәсьәләләре буйынса лекциялар ойоштороуҙы ла осраҡлы хәл тип кенә әйтергә мөмкин. Ауыл хужалығы алдынғыларының бай тәжрибәләрен колхозсыларҙың, МТС һәм совхоз эшселәренең киң массаһына еткереү эше системалы итеп алып барылмай.

Был етешһеҙлектәр лекторҙар һәм докладсылар менән даими эш алып бармау арҡаһында килеп тыуалар. ВКП(б) райкомдары, район Советтәренең культура-ағартыу эштәре бүлектәренең работниктәре штаттан тыш булған лекторҙарға насар етәкселек итәләр. Һәр бер районда ВКП(б) райкомдары эргәһендә докладсылар группаһы төҙөлгән, район Советтәренең культура-ағартыу эштәре бүлектәрендә лекторҙар группаһы бар. Ләкин күп райондарҙа был лекторҙарға һәм докладсыларға теоретик һәм методик ярҙам күрһәтелмәй. Лекторҙар группаһында төҙөлгән секциялар эшләмәйҙәр, секцияларҙа айырым лекцияларҙы тикшереү ойошторолмаған.

ВКП(б) райкомдары, район Советтәренең культура-ағартыу эштәре бүлектәре был етешһеҙлектәрҙе бөтөрергә, лекцион пропаганда эшенә етәкселекте көсәйтергә бурыслылар. ВКП(б) райкомдарына лекторҙарҙың һәм докладсыларҙың семинарҙарын йыш үткәрергә, партияның иң мөһим ҡарарҙары менән уларҙы таныштырырға, район алдында торған бурыстарҙы аңлатырға кәрәк. Партия һәм совет ойошмаларының етәкселәре халыҡ араһында фәнни-политик темаларға әҙерлекле лекциялар менән йыш сығыш яһап өлгө күрһәтергә тейештәр.

Лекцион пропаганда эшендә иң ҙур етешһеҙлек шунда: башҡорт һәм татар хеҙмәтсәндәре өсөн әсә телендә фәнни-политик темаларға лекциялар аҙ үткәрелә. Лекторҙар һәм докладсылар һайлап алғанда партия ойошмалары башҡорт һәм татар интеллигенцияһынан лекторҙар һәм докладсылар әҙерләүгә айырыуса иғтибар бирергә бурыслылар. Һәр бер районда бындай кадрҙар күп, тик был мәсьәлә менән яҡындан шөғөлләнергә генә кәрәк.

Лекцияларҙың һәм докладтарҙың идея-теоретик кимәлен күтәреү иң мөһим бурыс булып тора. Лекцияларҙың йөкмәткеһе большевистик партиялылыҡ рухы менән һуғарылған булырға тейеш. Һәр бер лекция йәки доклад халыҡта совет патриотизмы тәрбиәләүсе, беҙҙең араға буржуаз идеологияның кереүенә ҡыҫҡан килешмәүсәнлек тәрбиәләүсе, совет государство һәм общество ҡоролошоноң, совет фәненең һәм культураһының тулы өҫтөнлөгөн иҫбат итеүсе булырға тейеш.

Һәр бер лекцияның, докладтың ҡиммәте уның тәьҫирле булыуында. Лекция, киң халыҡ массаһын бөгөнгө көндөң мөһим бурыстарын хәл итеү өсөн көрәшкә мобилизовать итһен. Лекцион пропаганда киң массаны героик хеҙмәткә рухландырһын.

Туймазы районы Бөтә Союз ярышында өсөнсө урынды алды

ВЦСПС һәм СССР әҙерләүҙәр Министерствоһы малсылыҡ продуктылары тапшырыу буйынса әҙерләүсе ойошмаларҙың 1948 йыл беренсе кварталда Бөтә Союз социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡараны.

Был ярышта өсөнсө урын һәм аҡсалата 4500 һум премия Туймазы районына бирелде.

Шулай уҡ Ҡыйғы, Илеш, Дыуан, Бүздәк, Ауырғазы, Мәсетле, Борай райондарында малсылыҡ продуктыларын әҙерләү эшенең яҡшы булыуы билдәләнде.

—☆—

Пландан тыш ашлыҡ сәсәләр

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Ҡуҙғатыу», «Ҡыҙыл байраҡ», «Балтаҡкан» колхоздары һабаҡ ашлыҡ культураларын сәсеүҙе тамамланылар.

«Балтаҡкан» колхозы бойҙай сәсеүҙе 6 эш көнөндә башҡарҙы. Бойҙай бары тик яҡшы эшкәртелгән сиҙәм ерҙәргә генә сәселде.

Был колхоздар хәҙер пландан тыш ашлыҡ сәсәләр.

Сәсеү планын һәр бер колхоз, совхоз үтәргә һәм арттырып үтәргә бурыслы

☆ ☆ ☆ ☆ ☆ ☆ ☆

Байғужа МТС-ы механизаторҙарының уңышы

ЯҢАУЫЛ. (Телефон аша). Байғужа МТС-ы (директоры иптәш Кәримов) коллективы быйыл яҙғы сәсеү эштәрендә айырыуса ҙур уңыштарға өлгәште. МТС хеҙмәтләндергән 15 колхозда яҙғы сәсеү 25 майға тулыһы менән тамамланды. Был колхоздарҙа эшләүсе тракторҙар хәҙер пар һөрөү эшенә тотондолар.

Үткән йылдың ошо ваҡыты менән сағыштырғанда, МТС тарафынан 1000 гектар самаһы ер артыҡ эшкәртелде.

Трактор бригадалары араһында социалистик ярышта район Советы депутаты иптәш Зияҙов етәкселек иткән трактор бригадаһы алда бара. Уның бригадаһы 406 гектар ер һөрөү планын сроктан алда 115 процентҡа үтәне, 100 килограмм яғыулыҡ экономия яһаны.

Иптәш Зияҙов бригадаһындағы һәр бер трактор 220-шәр гектар ер эшкәртте. Хәҙер был алдынғы бригада май пары һөрә.

Ә. Вәлиев.

Яуапһыҙ ҡараш

КРАСНОУСОЛ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Ғафури районының ҡайһы бер колхоздарында барма, унда тракторҙарҙың насар эшләүҙәренән зарланалар.

— Тракторҙар күберәк тик тора шул, юҡ ине, эштәр гөрләп барыр ине, — тиҙәр колхозсылар. Басыуҙарға сығыу менән үк был һүҙҙәрҙең дөрөҫлөгөнә ышанаһың.

«Бурлы», «Ҡыҙыл бүләк», «Иген йылға», «Ҡыҙыл ялан» колхоздарындағы тракторҙар ватылыуҙан бушамайҙар. «Бурлы» колхозындағы трактор һуңғы 4 көндә ни бары бер гектар ер һөрҙө. «Иген йылға» колхозындағы 3 тракторҙың көндәлек эштәре 0,70 гектарҙан артмай. «Краснодубровка» һәм «Красная заря» колхоздарындағы тракторҙар сәсеү башланғандан бирле бер гектар ҙа ер һөрмәкеләр, басыуҙа әле лә ватылып ултыралар.

МТС-тағы 61 тракторҙың 15-е бөтөнләй эшләмәй. Эш өҫтөндә боҙолған, ватылған тракторҙарҙы ремонтлау өсөн 3 күсмә мастерской ойошторолғайны, ләкин улар трактористтәргә кәрәкле ярҙамды күрһәтмәйҙәр. Автомашиналарға урынлашҡан был мастерскойҙар тракторҙарға басыуҙарҙа ярҙам күрһәтергә тейеш булһалар, бында киреһенсә эшләнә, тракторҙар күсмә мастерскойҙар янына килтереләләр. «Украинец» һәм «Красная заря» колхоздарындағы тракторҙар аҙналар буйы мастерскойҙы эҙләп йөрөп, юл буйында туҡтап ҡалдылар.

МТС-та яңы алынған 22 «НАТИ» тракторы бар. Ләкин улар ҙа тулы көсөндә файҙаланылмайҙар. «Сталинец» һәм Маяковский исемендәге колхоздарҙа яңы тракторҙарҙы тырматыу эшенә беркеткәндәр.

— Һабандарҙы үҙегеҙ эшләп алығыҙ, — тинеләр МТС механиктәре колхоз председателенә. Колхозда 3 төрәнле һабан эшләнде. Ләкин трактор был һабан менән сей ҡалдырҙы, һай һөрҙө. Һөҙөмтәлә 15 гектар ер боҙолдо.

«Красный бор», «І Морак» һәм Киров исемендәге колхоздарҙа яңы тракторҙар 3 корпуслы иҫке һабандар менән эшләйҙәр, ваҡытты әрәмгә уҙғаралар. Уларҙың һабандары МТС-та ята.

Трактор бригадаларында төнгө сменалар ойошторолмаған. Трактор паркының файҙаланылыуы өҫтөнән контроль юҡ. Шуның файҙаланып, «Украинец» колхозын хеҙмәтләндереүсе Мельцев һәм күп кенә башҡа трактористәр индивидуаль баҡсаларҙы һөрөүҙә эшләйҙәр.

Ошондай сәбәптәр һөҙөмтәһендә МТС-та график үтәлмәй. Көн һайын 693 гектар урынына, ни бары 340 гектар ер эшкәртелә. Колхоздар менән төҙөшкән договорҙар 22 майға һөрөү буйынса тик 35, культивациялау буйынса 40 һәм сәсеү буйынса 45 процентҡа ғына үтәлде.

Ғ. Ҡотлобаев.

—☆—

Алдынғы колхоздарҙа

ЙОМАҒУЖА. (Телефон аша). Райондың иң ҙур колхоздарынан — Максим Горький исемендәге колхоз 25 майға яҙғы сәсеүҙе тамамланы. Колхоз быйыл пландан тыш 21 гектар, бөтәһе 1230 гектар ашлыҡ сәсте. Был майҙан үткән йылға ҡарағанда 110 гектарға артыҡ. Шулай уҡ районның «Равенство», «7 ноябрь» һәм «Политотдел» колхоздары ла күрһәтелгән көнгә сәсеү пландарын арттырып үтәнеләр.

Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 25 майына, процентарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән	Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгән
1.	Туймазы	86,5	83	33.	Благовещен	65,2	60
2.	Салауат	84,5	97	34.	Ҡалтасы	65,2	55
3.	Белорет	84,0	114	35.	Краснокам	64,8	64
4.	Балтач	83,2	74	36.	Матрай	64,5	60
5.	Яңауыл	81,6	72	37.	Иәрмәкәй	64,4	56
6.	Дәүләкән	81,1	74	38.	Оло-Тиләк	64,2	58
7.	Ҡандра	78,0	68	39.	Миәкә	64,1	58
8.	Баҡалы	77,4	63	40.	Кушнаренко	63,8	52
9.	Покровка	77,2	77	41.	Йомағужа	63,5	55
10.	Өфө	74,4	70	42.	Иглин	63,2	58
11.	Асҡын	74,2	62	43.	Илеш	63,0	56
12.	Баймаҡ	74,0	88	44.	Федоровка	62,9	52
13.	Белоҡатай	73,6	83	45.	Ғафури	61,1	52
14.	Ҡыйғы	72,9	105	46.	Нуриман	60,8	51
15.	Бүздәк	71,9	64	47.	Бозаяз	60,7	55
16.	Әбйәлил	71,3	77	48.	Хәйбулла	60,3	60
17.	Стәрлетамаҡ	70,9	69	49.	Ҡырмыҫҡалы	60,0	53
18.	Шаран	70,8	57	50.	Ауырғазы	58,9	49
19.	Бөрө	70,7	61	51.	Саҡмағош	57,6	51
20.	Дыуан	70,2	78	52.	Дүртөйлө	57,3	52
21.	Мишкә	70,0	59	53.	Бишбүләк	56,9	52
22.	Байҡыбаш	69,7	65	54.	Абзан	55,8	47
23.	Борай	69,1	64	55.	Бәләбәй	55,6	46
24.	Шишмә	69,1	60	56.	Көйөргәҙе	55,6	60
25.	Әлшәй	68,5	54	57.	Мәләүез	54,7	48
26.	Тәтешле	68,5	65	58.	Күгәрсен	53,9	46
27.	Ҡариҙел	67,7	62	59.	Архангель	52,7	43
28.	Учалы	67,3	88	60.	Воскресен	52,7	48
29.	Благовар	66,5	63	61.	Зианчура	50,1	39
30.	Мәсетле	65,7	51	62.	Йылайыр	48,7	44
31.	Маҡар	65,6	58	63.	Бөрйән	45,2	38
32.	Стәрлебаш	65,3	60				

* * *

Май айының бишенсе биш көнлөгөндә сәсеү темпы тағы ла түбән төштө. Үткән биш көнлөккә ҡарағанда 50 мең гектар ашлыҡ кәм сәселде.

Яҙғы сәсеүҙә райондарҙың социалистик ярышында ҡуҙаҡлы культуралар сәсеү планын 102 процентҡа үтәгән Туймазы районы элеккеҫә беренсе урында. Салауат, Белорет райондары яҙғы сәсеү планын 84—84,5 процентҡа үтәп, икенсе һәм өсөнсө урындарҙы алып киләләр. Баҡалы районы колхоздары ла ҡуҙаҡлы культуралар сәсеү планын үтәне. Ҡандра, Мишкә, Бүздәк райондарында темп үҫә төштө.

Әле сәсеү планын үтәүҙән алыҫ торған Зианчура, Борай, Көйөргәҙе райондарында темп ҡырҡа түбәнәйҙе. Улар дүртенсе биш көнлөктә 15—18 процент үҫеш биргән булһалар, һуңғы биш көнлөктә уның яртыһы менән генә сикләнделәр. Шулай уҡ Йылайыр, Абзан, Бәләбәй, Бишбүләк, Архангель, Дүртөйлө, Күгәрсен райондары ла ғәфү итмәҫлек түбән темп менән сәстеләр. Был һәм башҡа күп кенә райондарҙа (Воскресен, Мәләүез, Саҡмағош райондарында) артта ҡалыуҙы бөтөрөү һәм темпты күтәреү өсөн большевистик көрәш юҡ.

Һуңғы биш көнлөктә һөрөү темпы бер ни тиклем күтәрелһә лә, дөйөм алғанда план үтәлеше ҡәнәғәтләнерлек түгел. Насар темп менән һөргән райондар әле бик күп. Биш көндә 8—11 процент кенә үҫеш биргән Абзан, Маҡар, Архангель, Йомағужа, Дүртөйлө райондары һөрөүҙе ойошторомайынса, сәсеүҙең барышына тотҡарлыҡ итәләр.

Республиканың күпселек райондарында сәсеү менән хәл бик тревогалы. Әле иртә культуралар ҙа сәселеп бөтөрөлмәгән. Эште артабан былай һуҙыу урожайҙы ҡырҡа түбәнәйтеүгә алып бара. Хәҙер бөтә саралар менән иртә культуралар сәсеүҙе тамамлап, бөтә көстө һуңғы культуралар сәсеү планын тиҙерәк үтәүгә тупларға кәрәк.

Ауырғазыла сәсеүҙе һуҙалар

Ауырғазы районында яҙғы сәсеү планының үтәлеше—58,9 процент. Бында сәсеү майҙанының биштән бер өлөшөн генә сәскән колхоздар ҙа бар.

Район етәкселәре артта ҡалыуҙың объектив сәбәптәрен эҙләп маташмайҙар. Яҙҙың һуң килеүенә һылтаныу еңел уйлылыҡ булыр ине. Район Советы башҡарма комитеты председателе иптәш Ғәликәев сәсеү темпының аҡрын барыуын тракторҙар паркының насар эшләүе, йәкле тартыу көстәренең нормаларҙы үтәмәүҙәре һәм колхоздарҙа хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолмауы менән аңлата.

Иптәш Ғәликәев хаҡлы. Бигерәк тә Ташлыкүл МТС-ы насар эшләй. Ләкин тракторҙар тик тормаһын, һәр бер тракторист көндәлек заданиеһен үтәһен өсөн район Советы, уның ауыл хужалығы бүлеге, МТС етәкселәре нимә эшләнеләр һуң? Эшлекле саралар күрелмәй.

Ошо көнгә тиклем МТС-та күсмә ремонт мастерскойҙары булмаһы. Участка механиктәре күп ваҡыттарын усадьбала уҙғаралар. Был МТС-та 4 «С — 80», 8 «НАТИ», 29 «СХТЗ» һәм 7 «Универсал» трактор бар. Ләкин был ҙур көс тейешенсә файҙаланылмай. Ремонт ваҡытында сифат өсөн көрәш һәм контроль булмағанлыҡтан, тракторҙар беренсе бураҙнала уҡ ватыла башланылар. Уларҙы ремонтлау эше насар ҡуйылған. МТМ төндә эшләмәй. 15 көн эсендә МТС-тың тракторҙары 205 смена тик торҙолар. Ә «8 март» колхозында «С—80» һәм «У—2» тракторҙары 14 тәүлек эшләмәнеләр. Һөҙөмтәлә колхоз 454 гектар урынына ни бары 233 гектар ашлыҡ сәсте. «Ҡыуғанаҡ» колхозы тураһында ла шуны әйтергә мөмкин. Бындағы трактор бригадаһы колхоз менән төҙөшкән договорҙы 25 процентҡа ғына үтәне. «СХТЗ» тракторы йыш ватыла. Биш тапҡыр моторҙың прокладкаһы янды. Распредвал дөрөҫ ҡуйылмағанлыҡтан, трактор агрегатты һөйрәтә алмай. Трактористәр был етешһеҙлектәрҙе үҙҙәре бөтөрә алмаһылар. Өлкән механиктең ярҙамы кәрәк булды, ләкин иптәш Кравчук бында бер генә тапҡыр ҙа булып китмәне.

МТС-та һабандар етешмәй, тип зарланалар. Ә шул ваҡытта шефлыҡ итеүсе Стәрлетамаҡ заводынан килтерелгән һабан МТМ-да ремонтланмайынса ята. «Ураҡ» колхозында дизель тракторы бер һабан менән генә эшләне. Колхозда тракторға өс төрәнле «СХТЗ» һәм ат һабаны өҫтәп таҡтылар. Хеҙмәт етештереүсәнлеге ҡырҡа күтәрелде. Был методты башҡа колхоздарға күсереү урынына, МТС етәкселәре өҫтәмә һабан тағыуҙы ҡырҡа тыйҙылар. Тракторҙар менән бер үк ваҡытта һөрөү, тырматыу һәм сәсеү уҙғарылмай. Һөҙөмтәлә МТС колхоздар менән төҙөшкән договорҙы сәсеү буйынса 23, һөрөү, культивациялау буйынса 58 процентҡа ғына үтәне. МТС тағы ла 8 мең гектар ерҙе һөрөп сәсергә тейеш.

Эштең ошондай халдә тороуына ҡарамаҫтан, район Советы исполкомы һәм уның председателе иптәш Ғәликәев тыныслыҡҡа бирелгән. Ул МТС-та һәм трактор бригадаларында була. Ләкин уның килеп китеүе эҙ ҡалдырмай. Трактористәр араһында хеҙмәт дисциплинаһының тарҡалыуы, техник тәрбиә ҡағиҙәләренең үтәлмәүе, социалистик ярыштың ойошторолмауы, политик-массовый эштең булмауы МТС етәкселәренең дә борсомай.

ВКП(б) район комитеты лә һуңғы көнгә тиклем тейешле һығымта яһаманы. Райком секретары иптәш Сабитов: «Сәсеүҙең күп өлөшөн тракторҙар башҡарырға тейеш», — ти. Бит ошо ғына ла МТС-ҡа етәкселек итеүҙе көсәйтеү кәрәклеген күрһәтеп тора. Район Советына һәм ВКП(б) райкомына һәр бер трактор бригадаһының эшен ентекле күҙәтеп барырға, уларҙың эше менән көн дә таныш булырға кәрәк ине. Ә был эшләнмәй.

Күпселек колхоздарҙа тик тракторҙарға ғына ышанып йәшәйҙәр, сәсеүҙе тиҙләтеү өсөн башҡа мөмкинлектәр файҙаланылмай. Районда һыйырҙарҙы ла баҫыу эштәрендә файҙаланырға мөмкин. Ләкин был турала уйламайҙар.

Районда 2800 эш аты бар. Тәрбиәнең насар булыуы, уларҙың көсөн дөрөҫ файҙаланмау һөҙөмтәһендә эш нормалары үтәлмәй. Пушкин исемендәге колхозда 22 ат иҫәпләнә. Һәр бер һабанға өс ат егелә. Шулай ҙа һабансылар көнөнә бер гектар урынына, ни бары 0,40 гектар ғына ер һөрәләр. Норманың үтәлмәүен колхоз председателе иптәш Николаев ерҙең насар булыуы менән аңлата. Дөрөҫ түгел. Сәбәп шунда: бында аттарға ялды бик һирәк бирәләр, уларҙы көнөнә ике генә тапҡыр ашаталар. Шуның өсөн дә биш һабан менән 15 көн эсендә 27 гектар ер һөрөлгән. Ошондай уҡ фактыларҙы «Большевик», «Ҡыҙыл юл», «Аврора» колхоздарында ла күрергә мөмкин.

Баҫыуҙарҙа эш сифаты ла насар. «Яҡты юл» колхозында трактор бригадаһы 40 гектар ерҙе 16 сантиметр тәрәнлектә сей ҡалдырып һөргән. Колхоз председателе иптәш Нафиков шунда булыуына ҡарамаҫтан, тракторист Ждановтан яҡшы эшләүҙе талап итмәй. Сәсеү сифаты ла уны борсомай. Сәскес машина көйләнмәгәнлектән, бер урынға 20—30 орлоҡ төшөрә һәм ергә күмелмәй китә.

Бындай фактылар Ташлыкүл МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа йыш осрай. Ә «Батыр бүләк» колхозында (председателе иптәш Аҡбашев) сәскес булыуға ҡарамаҫтан, ҡул менән сәсәләр. Район ауыл хужалығы бүлеге работниктәре һәм МТС агрономы иптәш Ғаске был етешһеҙлектәргә килешеп ҡарай.

Район яңынан 14 мең гектар, шул иҫәптән 4500 гектар бойҙай сәсергә тейеш. Эштең былай барышы сәсеүҙең оҙаҡҡа һуҙылыу ҡурҡынысын тыуҙыра.

С. Мәүлютов.
(Махсус хәбәрсебеҙ).

Партия тормошо

Трактор агрегаттарында политик-массовый эш

Дәүләкән МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа баҫыу эштәре ҡыҙыу рәүештә бара. Егерменсе майға МТС яҙғы баҫыу эштәре планын 85 процентҡа үтәне. Был, үткән йыл ошо ваҡытҡа башҡарылған эш менән сағыштырғанда, 4424 гектарға артыҡ, тигән һүҙ. Беҙ быға политик-массовый эште ҡырҡа көсәйтеү һәм, шул нигеҙҙә, һәр бер трактористың эшкә яуаплылығын күтәреү арҡаһында өлгәштек.

Коммунистар һәм комсомолецтар большевистик һүҙ һәм практик эш менән коллективта хеҙмәт етештереүсәнлеген арттырыу, МТС-тың колхоздар менән төҙөгән договорҙарын теүәл үтәү өсөн көрәшкә күтәрәләр.

Трактор бригадаларында 28 агитатор эшләй. Уларҙың күпселеге иң яҡшы эш өлгөләре күрһәтеүсе алдынғы трактористар. Баҫыу эштәренең тәүге көндәренән үк трактор агрегаттарында политик-массовый эш киң йәйелдерелде. Трактористар менән 1948—1949 йылдарҙа юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, ордендар һәм медалдар менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы ентекләп өйрәнелде. Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хаты, тракторҙарҙың хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм яҙғы баҫыу эштәре агротехникаһы тураһында беседалар үткәрелде. МТС һәм совхоздарҙың бөтә трактористарына, прицепщиктарына, трактор бригадаларының бригадирҙарына һәм механиктарына ВКП(б) Өлкә Комитетының хаты һәр бер механизаторға еткерелде. Хатҡа яуап итеп конкрет саралар билдәләнде. Агитаторҙар көндәлек эштең йомғаҡтарын беседалар үткәреү юлы менән һәр бер трактористка еткерәләр һәм стена газетаһы, «боевой листоктар», күрһәткес таҡталары аша яҡтыртып баралар.

Социалистик Хеҙмәт Геройы коммунист Алехиндың трактор бригадаһында агитацион-массовый эш айырыуса өлгәле итеп ойошторолған. Иптәш Алехин үҙе яҡшы агитатор. Уның беседалары һәр кемгә аңлайышлы һәм йөкмәткеле була. Шуға күрә лә, был бригадала хеҙмәт етештереүсәнлеге юғары.

Комсомолец тракторист иптәш Самсоненко 16 сменала 128 гектар урынына 146 гектар, тракторист иптәш Романенко 108 урынына 167 гектар ер эшкәртте. Бойков һәм Желобецкий иптәштәрҙең бригадалары ла массовый-политик эште маҡсатҡа ярашлы итеп ойоштороу арҡаһында күренекле уңыштарға өлгәштеләр.

МТС партия ойошмаһының бурысы хәҙер массовый-политик эште тағы ла киңерәк йәйелдереүҙән, уны иптәш Сталинға яҙған хатта алынған яуаплы бурыстарҙы үтәү маҡсатына ярашлы итеп ойоштороуҙан тора.

Р. Әхмәдиев,

Дәүләкән МТС-ы директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары.

Алдынғы производственник

Мөхтәр Ғиндуллин эшләгән цехта иң әһәмиәтле продукция булған кард сыбыҡтары етештерелә һәм башҡа яуаплы заказдар башҡарыла. Продукцияның күп өлөшө Советтар Союзының туҡыу промышленносе өсөн әҙерләнә. Кард сыбыҡтарын һуҙыу аңһат нәмә түгел. Метиз производствоһының иң капризле һәм ҡатмарлы технологияһы ошо сыбыҡтарҙы һуҙыу процесында һынау үтә. Ҙур хеҙмәт һалып эшләнелгән кард йомғаҡтарын тейешле урынына теүәл еткереү өсөн уны махсус ҡалай банкаларға, ағас йәшниктәргә дөрөҫ итеп тултыра белергә лә кәрәк.

Ошо кард сыбыҡтары һәм башҡа сыбыҡтар, улар бөтәһе лә Ғиндуллиндең ҡулы аша кәрәкле сорттарға айырылып, маркаларға бүленәләр, оҫта итеп ҡалай банкаларға, ағас йәшниктәргә тултырылалар. Банкаларҙың, йәшниктәрҙең һәр берһенең тышына продукцияның сорты, маркаһы яҙыла. Үҙенең берҙән-бер ярҙамсыһы Әфтәх Зәйнуллин менән Мөхтәр икәүһе смена һайын 35—40 банка, 50—60-шар йәшник тултыралар. Көн дә икешәр ярым норма бирәләр. Уларҙың айлыҡ задание үтәлеше 250—280 проценттан кәм булмай.

Ғиндуллин ҡорос-сыбыҡ заводында беренсе булып биш йыллыҡ норманы ике йылда тулыҡ көндә тамамланы.

1937 йылдан ошо цехта һәм шул уҡ эшендә өҙлөкһөҙ эшләп килгән, тәжрибәле стахановсы хеҙмәттең бындай юғары күрһәткестәренә үҙ эшенең техникаһына эйә булыуы арҡаһында өлгәшә.

Уның ҡулы менән тултырылып ебәрелгән продукцияның бер генә йәшиге лә, бер генә банкаһы ла бракҡа сығарылғаны, заказчиктар тарафынан кире ҡайтарылғаны юҡ. Советтар Союзының күп предприятиеларына оҙатылған заказдарҙың яҡшы упаковать ителгәне өсөн Ғиндуллинға рәхмәттәр белдереп хаттар яҙалар.

М. Хәйҙәров.
Белорет.

Советтәр Союзында



Сталинград. И. В. Сталин исемендәге Царицын — Сталинградты обороналау музейының аяҡҡа баҫтырылған бинаһы.

А. Маклецов фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

Яңы һүҙлектәр

Сит ил һәм милли тел һүҙлектәре государство издательствоһы профессор Д. Н. Ушаков редакцияһында «Рус теленең аңлатмалы һүҙлегенең» яңы баҫмаһының беренсе томын баҫып сығарҙы. Томға 1.463 һылтанма һүҙҙән тыш 25.916 һүҙ индерелде.

Русса-французса (20 мең һүҙ), французса-русса (25 мең һүҙ) ҡыҫҡаса һүҙлектәр баҫып сығарылды. Русса-башҡортса, русса-эрзянса, русса-эвенкийсә, русса-полякса һүҙлектәр баҫылалар.

(ТАСС).

Илебеҙ баҫыуҙарында

Илебеҙҙең бөтә урындарында ла баҫыу эштәре ҡыҙыу темп менән бара. Урта Азияның көньяғында һәм Азербайжанда урожай йыйыу эштәре башланды.

Май айының икенсе декадаһында илебеҙҙең МТС-тары ер эшкәртеүҙә юғары күрһәткестәр бирҙеләр. 10 көн эсендә тракторҙар менән 18 миллион гектар ер эшкәртелде. Был, 1940 йылға сағыштырғанда, 1,5 миллион гектарға артыҡ, тигән һүҙ.

Ҡырым һәм Мәскәү өлкәләре, шулай уҡ Таджик ССР-ы 20 майға тракторҙар менән яровой культуралар сәсеү планын үтәнеләр. Украина һәм Төркмәнстан, Кабарда АССР-ы, Астрахань, Ленинград һәм башҡа өлкәләр тамамлайҙар. Украинала тракторҙар менән үткән йылға ҡарағанда 1 миллион гектарға артыҡ сәселде.

Колхоз председателдәренең квалификацияһын күтәреү

Кубанда 60 урында колхоз председателдәре өсөн ике йыллыҡ район мәктәптәре ойошторолдо. Колхоз председателдәре производство менән айырылмайынса уҡыйҙар. Улар айына ике тапҡыр район үҙәгенә ике көнгә мәктәпкә уҡырға киләләр. Улар ауыл хужалығы белеме һәм колхоз производствоһын ойоштороуҙы, шулай уҡ тыш арифметика һәм туған телде өйрәнәләр.

Мәктәптәрҙә крайҙың иң яҡшы белгестәре, профессорҙар һәм фәнни работниктәр уҡыталар.

Колхозсылар өсөн автомашиналар

Сумск өлкәһенең ауыл кооперациялары айһындағы йылда 1400 велосипед һәм 24 мотоцикл һаттылар. Күптән түгел кооперация «Москвич» маркалы бер партия еңел автомашина алды. Бөтә машиналар ҙа бер нисә сәғәт эсендә колхозсыларға һатып бирелделәр.

Сауҙа ойошмаларына машина алырға теләүсе колхозсыларҙан заявкалар алалар.

Минскиҙә аяҡҡа баҫтырыу эштәре

Немецтар тарафынан емерелгән Белоруссия башҡалаһын аяҡҡа баҫтырыу киң ҡолас алды. Төҙәлеш эштәре 500 урында алып барыла. Ҙур торлаҡ йорттар, театрҙар, институттар, уҡыу йорттары, больницалар аяҡҡа баҫтырыла.

Күптән түгел 100 квартиралы торлаҡ йорт аяҡҡа баҫтырылды.

Үҙәк универмаг һәм күп ҡатлы 11 яңы йорт һалына.

Минск үҙәгенән алыҫ булмаған урында студенттар ҡалаһы аяҡҡа баҫтырыла. Яңы уҡыу йылы башланыуға Белоруссия государство институты һәм медицина институтының яңы корпустары аяҡҡа баҫтырыласаҡ.

(ТАСС).

Израиль государствоһы сит ил эштәре министре менән СССР Сит ил Эштәре Министре араһында телеграммалар алышыу

Сит ил Эштәре Министре, Молотов әфәндегә

Мәскәү.

Һеҙҙең тарафтан ҙур хөрмәт менән ошо йылдың 18 майында тапшырылған телеграммала күрһәтелгәнсә, СССР Хөкүмәтенең Израиль государствоһын официаль танығаны тураһындағы белдереүҙе минең хөкүмәтем бик ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡабул иткәнлеген белдереүҙе хөрмәтлә әйтәмен. Израиль государствоһы хөкүмәте һеҙҙең тарафтан шул тиклем үк мәрхәмәтлек менән күрһәтелгән теләктәргә тулыһынса уртаҡлаша, һәм Израиль государствоһы менән Советтар Союзы араһында яҡшы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаштырылыуға үҙенең ныҡ ышанысын бер ҡатҡыр раҫлай. Был мөнәсәбәттәр [illegible] государстволарыбыҙ тормошона [illegible] уңай йоғонто яһар. Ошо маҡсатта [illegible] Израиль государствоһының Мәскәүҙәге Посланнигы [illegible] беләмен.

Израилдең ваҡытлы государство советы исеменән

Моше Шерток,
Сит ил эштәре министры.

Израиль государствоһы ваҡытлы хөкүмәтенең сит ил эштәре министре Моше Шерток әфәндегә

Тель-Авив

Һеҙҙең 1948 йылдың 24 майында ебәргән телеграммағыҙҙы алғанлығымды дөрөҫләйем. Һеҙ был телеграммала Израиль государствоһы, һис киҫекмәҫтән, Мәскәүҙә үҙенең Миссияһын ойоштороп, һәм бер үк ваҡытта Тель-Авивта Совет Хөкүмәтенең Миссияһы ойошторолһон өсөн Совет Социалистик Республикалар Союзы Хөкүмәтенең ризалығын һорайһығыҙ.

Совет Хөкүмәте Мәскәүҙә Посланник йәки эштәрҙә Поверенный етәкселегендә, консул функцияларын башҡарыуҙы ла индереп, Израиль государствоһының Миссияһын ойоштороуға риза, һәм, үҙ нәүбәтендә, Тель-Авивта Совет Хөкүмәте Миссияһын төҙәргә әмер тип хәбәр итеү хөрмәтенә эйәмен.

В. Молотов,

Совет Социалистик Республикалар Союзының Сит ил Эштәре Министре.

Советтәр Союзы менән Индонезия Республикаһы араһында консул мөнәсәбәттәре булдырыу

Бынан бер ни тиклем ваҡыт элек Индонезия Республикаһы хөкүмәтенең махсус вәкиле посланник Соерипно әфәнде Индонезия Республикаһы Хөкүмәте исеменән Советтәр Союзы менән Индонезия Республикаһы араһында мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында тәкдим менән СССР-ҙың Прагалағы посольствоһы аша Совет Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итте.

Прагала ике Хөкүмәт араһында булып үткән һөйләшеүҙәр һөҙөмтәһендә консуллыҡ мөнәсәбәттәрен булдырыу һәм Советтәр Союзы менән Индонезия Республикаһы араһында үҙ-ара консулдар алышыу тураһында килешеүгә өлгәшелде.

Өлгәшелгән килешеү СССР-ҙың Прагалағы Ғәҙәттән Тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Посолы М. А. Силин менән Индонезия Республикаһының Махсус Ғәҙәттән тыш Посланнигы һәм Тулы хоҡуҡлы Министре доктор Соерипно араһында хаттар алышыу менән нығытылды.

Хаттар алышыу 22 майҙа Прагалағы Совет Посольствоһы бинаһында үткәрелде.

Хроника

СССР Верховный Советы Президиумы Иван Алексеевич Иванов иптәште СССР-ҙың Афғанстандағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы посолы итеп билдәләне.

* * *

СССР Верховный Советы Президиумы Иван Васильевич Самылковский иптәште СССР-ҙың Афғанстандағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы посолы вазифаларын үтәүҙән бушатты.

Рус халҡы—илебеҙ халҡтары араһында етәксе көс

1945 йылдың 24 майында Ҡыҙыл Армия ғәскәрҙәренең командующийҙары хөрмәтенә Кремлдә ҡабул итеүҙә иптәш Сталин Ватан һуғышында совет халҡының һәм, бөтәһенән элек, «Советтәр Союзы составына ингән бөтә милләттәрҙән иң күренекле милләт булған» рус халҡының хеҙмәттәрен билдәләне.

Рус халҡы, тип күрһәтте иптәш Сталин, был һуғышта беҙҙең илебеҙҙең бөтә халҡтары араһында Советтар Союзының етәксе көсө сифатында дөйөм танылыуға лайыҡлы булды. Иптәш Сталин рус халҡының һаулығы өсөн, ул етәксе халҡ булған өсөн генә түгел, бәлки ул асыҡ аҡылға, ныҡлы характерға һәм түҙемлелеккә эйә булған өсөн дә тост күтәрҙе. Рус халҡының совет хөкүмәтенә сикһеҙ ышаныуы, уның политикаһының дөрөҫлөгөнә ышаныуы һәм рус халҡының Совет хөкүмәтен һәм большевиктар партияһын һәр яҡлап яҡлауы «кешелек донъяһының дошманы — фашизмде тарихи еңеүҙе тәьмин иткән хәл иткес көс булып сыҡты» (Сталин).

Иптәш Сталиндең сығышы рус халҡы үҙенең күп быуаттарҙан бирле килгән героик тарихы эсендә уйнаған ролде һәм күп милләтле совет социалистик государствоһында уның тотҡан урынын билдәләне.

Немец-фашист илбаҫарҙарға ҡаршы Ватан һуғышында рус халҡы тотҡан күренекле роль уның тарафынан үтелгән тарихи юлдың закончы һөҙөмтәһе булды. Царизмға ҡаршы көрәш йылдарында, Октябрь социалистик революцияһы һәм граждандар һуғышы осоронда, тыныс социалистик төҙөлөш һәм Бөйөк Ватан һуғышы ваҡытында — һәр ваҡыт һәм бөтә ерҙә рус халҡы һуғыш эшенең һәм ижади хеҙмәттең төп ауырлығын үҙ елкәһендә күтәреп, хәл иткес авангард көс булып сығыш яһаны. Был беҙҙең ил халҡтарының рус халҡына ышанысын нығытты, уларҙың үҙ-ара бөйөк дуҫлыҡтарын сыныҡтырҙы.

Беҙҙең илебеҙ царизм ғәйебе менән халҡтар төрмәһе булған йылдарҙа уҡ, рус булмаған милләт халҡтары ауыр иҙелеүгә дусар ителгән йылдарҙа уҡ әле, рус халҡы дөйөм халҡ эше өсөн, бөтә илдә социаль һәм милли ҡоллоҡтан ҡотҡарыу өсөн үҙен ҡыйыу һәм ғәйрәтле көрәшсе итеп күрһәтте. Рус пролетариаты тирәһенә бөтә милләт хеҙмәтсәндәренең берҙәм революцион фронты туплананды; был фронт иҫке нәфрәтле ҡоролошто емереүҙә бик ҙур роль уйнаны һәм илебеҙ халҡтарының дуҫлығын әҙерләне.

Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә рус халҡы Россия халҡтарын социаль һәм милли иҙелеүҙән ҡотҡарыу буйынса үҙенең тарихи миссияһын достоин рәүештә үтәне. Бөтә иҙелгән һәм эксплоатацияланыусы массаларға етәкселек итеүгә күтәрелеп, рус пролетариаты, большевиктар партияһы етәкселегендә, уларҙы царизм өҫтөнән һәм буржуаз-помещиктар ҡоролошо өҫтөнән еңеп сығыуға килтерҙе. Үҙәк Россияның эшселәр синыфы һәм крәҫтиәндәре иҫке ҡоролоштоң төп нигеҙҙәрен емерҙеләр; Петроградта һәм Мәскәүҙә буржуазияны ҡолатмай торол, окраиналарҙа еңеүгә өлгәшеү мөмкин булмаҫ ине. Кавказ һәм Закавказья, Урта Азия һәм Алыҫ Көнсығыш, Украина һәм Белоруссия халҡтары туғандаш рус халҡының ярҙамы арҡаһында азатлыҡҡа һәм ысындан кешеләрсә йәшәүгә өлгәштеләр.

Рус халҡы беренсе булып социалистик революция яһау менән генә ҡалманы, ул яңы, совет общество һәм государство ҡоролошоноң нигеҙҙәрен беренсе булып һала башланы. РСФСР беренсе Совет республикаһы булды, ул халҡтарҙың тулы тиң хоҡуҡлыҡтары нигеҙендә һәм милли иҙеүҙәрҙе бөтөрөү нигеҙендә барлыҡҡа килде.

Октябрь революцияһы һөҙөмтәһендә илебеҙҙең халҡтары ирекле һәм тиң хоҡуҡлы булдылар. Ләкин, милләттәрҙең экономик һәм культура үҫеше кимәлендә айырма бөтөрөлмәгәйне, окраиналарҙың иҫке ҡоролоштан мираҫ булып ҡалған артталығы үҙен һиҙҙерә ине. Рус халҡы элек иҙелгән халҡтарҙың бөтәһенә лә күтәрелергә һәм уларҙың материаль һәм рухани көстәрен үҫтереүҙә бик ҙур һиҙерлек ярҙам итте.

Россия Федерацияһының иң эре промышленность һәм культура үҙәктәре — Мәскәү, Ленинград, Горький, Дондағы—Ростов һәм башҡалар — социалистик индустриализацияның форпостары һәм уның иң мөһим терәк пункттары, бөтә илгә яңы төҙөлөштәрҙе промышленность, техник кадрҙар менән, оборудование һәм материалдар менән тәьмин итеү сығанаҡтары булды. Ҡазағстанда, Грузияла, Әрмәнстанда, Үзбәкстанда, Белоруссияла һәм башҡа милли республикаларҙа һәм өлкәләрҙә төҙөү эштәрен йәйелдереү өсөн РСФСР территорияһында бөтә кәрәкле шарттар булдырылды. Россия Федерацияһы ауыл хужалығын коллективизациялау программаһын тормошҡа ашырыуҙа ла, халҡтарҙың мәғарифен һәм формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһын үҫтереүҙә лә тыуғандаш совет республикаларына бик ҙур ярҙам күрһәтте.

Рус культураһы ҡаҙаныштарына таянып, Совет власы йылдарында үҙе лә быға саҡлы күрелмәгән дәрәжәлә алға киткән Үҙәк Россияның материаль-техник базаһына таянып, большевиктар партияһы, Совет власы рус эшселәренең һәм крәҫтиәндәренең ныҡлы ярҙамдарында милли республикаларҙа һәм өлкәләрҙә үҫештең иң юғары темптарын тәьмин итте. Шуның менән, СССР-ҙың элек артта ҡалған экономикалы һәм артта ҡалған культуралы милли райондары илебеҙҙең алдынғы райондары кимәленә күтәрелделәр: уларҙың үҫеш кимәлдәре тигеҙләнде, шулай ҙа булһа айырым өлкәләрҙең һәм райондарҙың ғына түгел, бәлки бөтә илдең ҡеүәтле күтәрелешенә килтерҙе һәм халҡтарҙың фактик тиң хоҡуҡлылығы һәм дуҫлығы өсөн ныҡлы нигеҙ һалынды.

Большевиктар партияһы илебеҙҙең халҡтарын башҡа милләттәрҙе ихтирам итеү рухында тәрбиәләне, уларҙа үҙ социалистик Ватанына мөхәббәт тойғоһо һәм милли совет ғорурлығы үҫтерҙе. Ул СССР халҡтары араһында дөйөм халҡ интерестәрен бөйөк рәүештә аңлау, социалистик государство алдында яуаплылыҡ тойғоһо тәрбиәләне һәм халҡтарҙың милли традицияларының һәм СССР-ҙың бөтә хеҙмәтсәндәренең дөйөм тормош интерестәренең гармоник рәүештә бергә тура килтерелеүен тәьмин итте. Социалистик төҙөлөш барышында большевиктар партияһы буржуаз-милләтсе элементтарҙы тар-мар итте, Советтар Союзындағы бөтә милләт хеҙмәтсәндәренең миллионлаған массаларын ленинсе-сталинсе милли политика байрағы аҫтына туплаһы.

Ленинсе-сталинсе милли политиканы тайпылышһыҙ рәүештә үткәреү нигеҙендә үҫкән СССР халҡтарының дуҫлығы социалистик государствоның эске көсөнөң һәм еңелмәҫлегенең иң ҡеүәтле сығанаҡтарынан береһе булып тора. Был тыныс төҙөлөш осоронда ла һәм Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла асыҡ күренде. Фашистарҙың мәкерле һөжүм итеүҙәре бөтә милләттәге совет кешеләрендә дошманға ҡарата ҙур күрә алмаусылыҡ һәм Совет Тыуған иленә тағы ла ҡайнарыраҡ мөхәббәт тойғоһо тыуҙырҙы.

Тыныс социалистик төҙөлөш йылдарындағы кеүек, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла СССР халҡтарының авангардында бөйөк рус халҡы торҙо. Хәрби-экономик йәһәттән иң киң һәм иң ҡеүәтле республика — РСФСР — немец-фашист илбаҫарҙарын тар-мар итеүҙә беренсе дәрәжәләге мөһим роль уйнаны.

Фронтҡа ярҙам итеү буйынса бөйөк дөйөм халҡ эшенә рус халҡы тон бирҙе. Үҙенең үҫеше барышында дөйөм халҡ ҡоласын алған бик күп патриотик хәрәкәттәр рус халҡы араһында килеп тыуҙылар. Тыуған илебеҙҙең оборона фондына средстволар һәм ҡиммәтле әйберҙәр йыйыу, предприятиеларҙа пландан тыш продукция эшләп сығарыу һәм колхоздарҙа пландан тыш сәсеүлектәр булдырыу иҫәбенә главный командованиеның махсус фондын, еңеүҙең сталинсе фондын төҙөү, бер нисә профессияға эйә булыу һәм күп станокты хеҙмәтләндереү; Совет Армияһы өсөн ҡоралдар төҙөү өсөн средстволар йыйыу һәм башҡалар шуға инәләр.

Рус халҡының улдары данлыҡлы сталинсе полководецтар сафында етәксе ролде биләйҙәр, совет ҡоралды көстәре кадрҙарының төп ядроһы булған Советтар Союзы геройҙарының һәм орденоносецтарының ҙур күпселеген тәшкил итәләр. Һәм беҙҙең илебеҙҙең хәҙерге, һуғыштан һуңғы үҫеш осоронда ла рус халҡы СССР халҡтарының алдынғы сафтарында тора.

Халҡтар араһында уҙған йылдарҙа шул тиклем асыҡ күҙәлгән дуҫтарса хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам хәҙер тағы ла ҙурыраҡ көс менән күренә. Үҙҙәренең өлкән туғаны — рус халҡы етәкселегендә сафтарға тығыҙ тупланған совет халҡтары Ленин—Сталин партияһы етәкселегендә социалистик төҙөлөштө тамамлау һәм аҡрынлап социализмдан коммунизмға күсеү юлы менән баралар.

СССР халҡтарының ленинсе—сталинсе милли политика нигеҙендә үҫә барған дуҫлығы беҙҙең бөтә еңеүҙәребеҙҙең ҡеүәтле сығанағы, коммунистик общество төҙөү эшендә беҙҙең яңы уңыштарыбыҙҙың залогы булып тора.

«... СССР халҡтары араһында дуҫлыҡ, — тине 1935 йылда иптәш Сталин, — ҙур һәм серьез ҡаҙаныш. Сөнки был дуҫлыҡ йәшәгән ваҡытта беҙҙең илебеҙҙең халҡтары азат һәм еңелмәҫ буласаҡлар. Был дуҫлыҡ йәшәгәндә һәм ул иҫән саҡта беҙгә бер кем дә, эске дошмандар ҙа, тышҡы дошмандар ҙа ҡурҡыныс түгелдәр».

Н. Матюшкин.

Коллектив договор—планды үтәү өсөн көрәштә мөһим корал

1948 йылға төҙөлгән һәм регистрацияланған коллектив договорҙарҙа совет демократияһының тантана итеүе бөтә тулылығы менән кәүҙәләндерелгән. Социалистик промышленность һәм транспорт работниктәре хужалыҡ ойошмалары менән төҙөшкән был договорҙарында яңы биш йыллыкты срогынан алда үтәү һәм культура-тормош шарттарын яҡшыртыу өсөн көрәш программаһын билдәләнеләр.

Республикабыҙҙың күп предприятиеларында, мәҫәлән, Черниковск нефть эшкәртеү, Тирлән листопрокат заводтарында, Ишембай нефть промыселдарында һәм башҡа предприятиеларҙа иҫке договорҙарҙың үтәлешен тикшереү һәм яңыларын төҙөү кампанияһы эшселәр араһында ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Белорет кос-сымыҡ заводының эшселәре договорға производствоны рационализациялаштырыу, алдынғы методтарҙы индереү, технологик процестарҙы яҡшыртыу буйынса тиҫтәләрсә ҡиммәтле тәҡдимдәр индерҙеләр.

Коллектив договор — ул планды үтәү өсөн, хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош кимәлен яҡшыртыу өсөн көрәштә мөһим ҡорал булып тора. Черниковск нефть эшкәртеү заводының эшселәре үҙҙәренең дөйөм профсоюз йыйылыштарында үткән йылғы договорҙарының үтәлешен тикшергәндә хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү һәм көн-күреште яҡшыртыу юнәлешендә ҙур эштәр башҡарылғанлығын әйттеләр. Бында хужалыҡ органдары тарафынан торлаҡ йорттарын, дауаланыу учреждениеларын төҙөү, эшселәр посёлкаларын төҙекләндереү буйынса күп кенә эштәр эшләнелгән.

Хәҙер коллектив договорҙар төҙөлгән һәм регистрацияланған икән, бөтә көстә һәм средстволарҙы туплап уларҙың үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, норманың һәр бер эшсе тарафынан үтәлеүе һәм арттырып үтәлеүе өсөн шарттар тыуҙырыу мәсьәләләренә айырыуса иғтибар итергә тейеш. Хеҙмәт етештереүсәнлегенең яңы күтәрелешенә өлгәшеү маҡсатында республикабыҙҙың күп предприятиелары эшселәре стахановсы сменалар һәм цехтар төҙөйҙәр. Был эштә уларға хужалыҡ, партия, профсоюз һәм комсомол ойошмалары бөтә яҡлап ярҙам күрһәтеп барырға тейештәр.

Хужалыҡ һәм профсоюз ойошмалары стахановсылар тәжрибәләрен, хәҙерге заман техникаһын өйрәнеүҙәрен үҙ предприятиеларында киң йәйелдерергә тигән бурыс ҡуйҙылар һәм улар яңы коллектив договорҙа әһәмиәтле моменттарҙың береһе булып торалар. Хужалыҡ ойошмаларының етәкселәре был бурысты алдынғы эшселәр һәм инженер-техник работниктарҙы киң ылыҡтырғанда ғына уңышлы рәүештә тормошҡа ашыра аласаҡтар.

Ритмле эшләүҙә, хеҙмәт етештереүсәнлегек һәм продукцияның сифатын күтәреүҙә, үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙә предприятиеның ойоштороу-техник саралар планы айырыуса мөһим роль уйнай. Беҙҙең хужалыҡ предприятиеларебеҙҙең ундай пландары бар инде. Уны тормошҡа ашырыу, һис шикһеҙ, стахановсыларҙың сафын күбәйтеүгә ҙур булышлыҡ итәсәк.

Иптәш Сталин стахановсыларҙың беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә үк әле стахановсылар хәрәкәтен артабан йәйелдереүгә һәм уны киң таратыуға бөтә яҡлап ярҙам итергә кәрәк, тип күрһәткәйне. Был әһәмиәтле эштең уңышы производство техникаһын камиллаштырыу һәм производство процестарын механизациялаштыра барыуға нык бәйләнгән. Шулай ҙа беҙҙең ҡайһы бер предприятиеларҙа уға етерлек иғтибар бирмәйҙәр. Мәҫәлән, Белорет металлургия заводында күп хеҙмәт талап иткән эштәр хәҙерҙә лә әле механизациялаштырылмағандар. Эшселәр был мәсьәләләрҙе 1948 йылғы коллектив договорҙарына индерҙеләр. Хеҙмәтте механизациялаштырыу тураһында хәстәрлек итеү мөһим бурыс икәнлеген хужалыҡсылар хәтерҙәренән сығармаҫҡа тейештәр.

Эшләп сығарыу һәм хеҙмәткә түләү мәсьәләһендә большевистик тәртип булдырырға кәрәк. Айырым предприятиеларҙа был мәсьәлә буйынса сериоз етешһеҙлектәр йәшәп килә. Эшләп сығарыу нормаһын, шулай уҡ хеҙмәткә түләүҙе тәртипкә килтереү хеҙмәт етештереүсәнлегенең йылдам үҫеүенә ярҙам итергә тейеш.

Большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттарын яҡшыртыу тураһында даими рәүештә хәстәрлек күрәләр. Беҙҙең коллектив договорҙарҙа был мәсьәлә хужалыҡ органдарына яуаплы бурыстарҙың иң ҙур бер өлөшө итеп йөкмәтелә. Бигерәк тә торлаҡ төҙөлөшө айырыуса әһәмиәткә эйә. Ләкин шуны әйтергә кәрәк, ҡайһы бер хужалыҡ ойошмаларының етәкселәре, атап әйткәндә, йәш нефть ҡалаһы—Октябрьскиҙа быға сериоз иғтибар биреп еткермәйҙәр әле. Торлаҡ биналарын эксплоатацияға тапшырыу пландарының квартал һайын өҙөлөп килеүен бары тик шуның менән генә аңлатырға мөмкин.

Коллектив договорҙарҙың үтәлеше өҫтөнән общественный контроль булдырырға кәрәк һәм был, алынған йөкләмәләрҙең үтәлеүе өсөн хужалыҡ органдарының яуаплылығын ҡырҡа күтәрәсәк.

Биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн илебеҙҙә социалистик ярыш әлекән-әле киң йәйелдерелә бара. Ул эшселәргә, инженер-техник работниктәргә, хужалыҡ ойошмалары етәкселәренә предприятиеларҙың эшен тамырынан яҡшыртыу буйынса коллектив договорҙарҙа күрһәтелгән йөкләмәләрҙе намыҫлы рәүештә үтәү өсөн эшлекле ярҙам итәсәк.

Республикабыҙҙың башҡалаһын төҙөк һәм матур ҡала итәйек!

Молотов районы Киров районын ярышка саҡырҙы

РСФСР Министрҙар Советының һәм ВЦСПС-тың төҙөкләндереү эше буйынса ҡалалар ара социалистик ярыш ойоштороу тураһындағы ҡарары ойоштороу тураһында ҡарарын үтәү йөҙөнән Өфөнөң Молотов районы Советы байтаҡ ойоштороу сараларын үткәрҙе. Исполком үҙенең ултырыштарында беренсе районда йәшелләндереү, культура-санитар ыңғайлы сараларҙы тикшерҙе. План объектлы биналарҙы, торлаҡ йорттарын, йоҡмаларҙы һәм капиталь ремонтлау һәм буяу, йорт алдарын, баҡсаларҙы, урамдарҙы, тротуарҙарҙы, майҙандарҙы таҙартыу һәм уларҙы сағыштырыу уҡтары кәрәк. Ошолар менән бер рәттән район Советы исполкомы төҙөкләндереү эше буйынса социалистик ярыш договоры проектын раҫланы һәм уны Киров районы советына тапшырҙы.

Был ҙур эштә даими комиссиялары, урам комитеттары, йорт идаралары ...

... Воскресник үткәреү тураһында ... мәҡәләләр ...

Воскресник ойошторолдо

Өфө ҡалаһындағы ярыу машиналары заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре республикабыҙҙың башҡалаһын төҙөкләндереүгә ярҙам итеү маҡсатында ВКП(б) ҡала комитетының ... воскресник ойоштороу ... 23 майҙа ... 98 кеше һәм автомашиналар ...

... ВКП(б)-ның район комитеты төҙөкләндереү эшен ойоштороу ...

Г. Әмир.

Һүрәттә: Өфөнөң Ленин урамынан бер күренеш.

Г. Бураһиң фотоһы.

Көҙгө сәсеү өсөн ерҙе ваҡытында әҙерләргә

Республикабыҙҙың иген балансында арыш ҙур урын тота. 1949 йылда арыш бөтә бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының 23,8 процентын тәшкил итәсәк. Бына шуның өсөн дә республикабыҙҙың ауыл хужалығы производствоһында был культураның әһәмиәте бик ҙур.

Арыштан юғары урожай алыуҙа иртә һәм яҡшы эшкәртелгән пар ере ҙур роль уйнай. Пар һөрөү тупраҡтың уңдырышлылыҡ сифатын күтәрә, ерҙә дымды күберәк йыйнай һәм һаҡлай. Шулай уҡ таҙа парҙар баҫыуҙарҙы ҡый үләндәренән таҙартыуҙа ышаныслы сара булып торалар. Пар ерен эшкәртеүҙә бөтә агротехник талаптарҙы үтәү ужым культураларының юғары урожайлылығын гарантиялай һәм сәсеү әйләнешендә унан һуң сәселә торған культураларҙың урожайын күтәреүгә ныҡлы йоғонто яһай.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарында күрһәтелгәнсә беҙҙең республикабыҙҙа пар һөрөү 10 июнгә тамамланырға тейеш. Пар ере ни тиклем иртәрәк һөрелһә, ул шул тиклем яҡшыраҡ була. Күп колхоздарҙың тәжрибәләре уның шулай икәнен бик асыҡ күрһәтәләр. Баҡалы районының «Красный пахарь» колхозы ашлама индерелгән баҫыуҙа пар ерен май айында һөрөү һәм йәй 4 тапҡыр эшкәртеү һөҙөмтәһендә 1947 йылда арыштың һәр бер гектарынан 25 центнерҙан артыҡ урожай алды. Бөрө, Дәүләкән, Дүртөйлө райондары колхоздары ла пар ерен яҡшы һәм үҙ ваҡытында эшкәртеүҙәре арҡаһында юғары урожай алыуға өлгәштеләр.

Пар ерен эшкәртеүҙең әһәмиәте ужымдарҙың быйылғы торошонан да күренеп тора. Һуң һәм насар эшкәртелгән пар баҫыуҙарындағы ужымдар күп урындарҙа насар. Воскресен районы колхоздары уҙған йыл пар һөрөүҙе һуңлаттылар һәм ерҙе ваҡытында эшкәртмәнеләр, арышты һуңлап сәстеләр. Шул арҡала бындағы ужымдарҙың байтаҡ өлөшө быйыл һәләк булды.

Шуға күрә хәҙер һәр бер көн, һәр бер сәғәт пар ере һөрөүгә файҙаланылырға тейеш. Быны яҡшы аңлаған алдынғы колхоздар яҙғы сәсеү менән бер үк ваҡытта пар һөрәләр, сәсеү эшенән бушаған тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көстәрен пар һөрөү эшенә күсерәләр.

Ләкин ҡайһы бер райондар быйыл да, уҙған йылдарҙағы кеүек үк, пар һөрөүҙе һуңлаталар. Республика колхоздары 20 майға пар майҙанының 15 процентын һөрергә тейештәр ине, ә фактик рәүештә күпселек райондар уға әле булһа башламағандар. Бөрө, Благовещен, Ҡандра райондарында иртә культуралар сәсеүҙе тамамлаған байтаҡ колхоздар әле булһа пар һөрөүгә тотонмағандар. Туймазы районында яҙғы сәсеүҙе тамамлаған 15 колхоздың береһе лә пар һөрмәй, ә Өфө районында сәсеүҙе бөтөргән 9 колхоздың тик 2-һе генә был эште башлаған. Был райондарҙың ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәре, МТС директорҙары, агрономдар пар һөрөү эшен ойоштороуҙа ғәмһеҙлек күрһәтәләр.

Ауыл хужалығы органдары работниктәре пар һөрөү планын срогында һәм яҡшы итеп үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрергә бурыслылар. Яҙғы сәсеү эшенән бушаған һәр бер тракторҙы, йәнле тартыу көсөн пар һөрөүгә күсерергә, һөрөүҙә төнгө сменалар ойошторорға, графиктең үтәлеүенә һәм арттырып үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Пар һөрөүҙә агротехникаға айырыуса ҙур иғтибар итергә тейеш. Ерҙе предплужникле һабан менән 20—22 сантиметр тәрәнлектә һөрергә һәм бер үк ваҡытта тырматырға барырға кәрәк. Һөрөү алдынан ергә тиреҫ ашламаһы индерелергә тейеш. Пар ерҙәрен артабан эшкәртеүҙе лә ваҡытында үткәрергә кәрәк. Беҙҙең шарттарҙа пар майҙаны йәй буйына кәмендә 3 тапҡыр культивацияланырға тейеш. Агрономдар кәмендә 10 көнгә бер тапҡыр был эштең торошона тикшереү үткәрергә бурыслылар. Пар ерҙәрен яҙғы бойҙай өсөн дә һөрергә кәрәк.

Ужым культуралары урожайына нигеҙ пар ерҙәрен ваҡытында яҡшы һөрөү һәм эшкәртеү менән һалына. Шуға күрә пар күтәртеүҙе билдәләнгән сроктарҙа һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү һәм ерҙе артабан эшкәртеү государство әһәмиәтендәге бурыс булып тора.

Н. Рудиев,
БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының бөртөклө ашлыҡ һәм майлы культуралар бүлеге начальнигы.

Трактор туктауһыҙ эшләй

Бөрө МТС-ының иптәш Баландин бригадаһы «Совет» һәм Андреев исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндерә. Бригада «СХТЗ» һәм «СТЗ—НАТИ» тракторҙары менән 145 гектар ер һөрҙө, 140 гектар культивацияланы, 405 гектар тырматты һәм 215 гектар ашлыҡ сәсте, шартлы һәр бер тракторға 100 гектарҙан артыҡ ер эшкәртелде.

Үҙ-ара ярышыусы трактористарҙан Афанасий һәм Алексей Рябовтар баҫыу эштәре башланғандан бирле һәр сменала 7,6 гектар урынына, 10,9 гектар, ә айырым көндәрҙә 13—14 гектар ер һөрәләр. «НАТИ» тракторы менән сәсеүҙә смена нормаһы 170—184 процентҡа үтәлә. Трактор төндә һөрә, ә көндөҙгө сменала культивациялай һәм сәсә. Төшкө аш һәм ял ваҡыттарында ла трактор тик ултырмай. Трактористе бригадир иптәш Баландин алыштыра һәм ер һөрә. Шулай итеп, бригаданың тракторы һис туктауһыҙ эшләп килә.

Бригадала өс коммунистан торған партгруппа ойошторолдо. Парторг иптәш Белюшин политик-массовый эште яҡшы алып бара.

С. Сәғитов.

В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу алдынан

Бөйөк халыҡтың бөйөк улы

Күп милләтле совет халҡы ошо айҙың 7 июнендә рус халҡының бөйөк улы — Виссарион Григорьевич Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу көнөн билдәләргә әҙерләнә. Барлыҡ донъяның алдынғы кешеләрен таң ҡалдырырлыҡ талантҡа бай рус халҡы үҙенең күп быуаттарға һуҙылған тарихында иҫ киткес ҙур культура хазинаһы туҙырҙы. Беҙҙең социалистик общество шарттарында был хазина СССР-ҙа бер туғандай йәшәүсе бөтә милләттәрҙең дә уртаҡ байлығына, дөйөм совет милли ғорурлығы сығанаҡтарының береһенә әйләнде. Иптәш Сталин Белинскийҙе беҙҙең законлы ғорурлығыбыҙ булып торған исемдәр рәтенә һанап үтте.

Белинскийҙең көрәш байрағын эләкмәй, артабан күтәреп алып китеүсе Н. А. Добролюбов бынан 90 йыл элек уның тураһында былай тип яҙҙы: «Рус әҙәбиәте менән ни генә булмаһын, нисек кенә үҫереп үҫмәһен ул, Белинский һәр ваҡыт уның ғорурлығы, уның шаны, уның биҙәүсеһе булып ҡаласаҡ».

Белинскийҙең эшмәкәрлеге, ижады бик күп яҡлы: Ул — Россияла материалистик философияны башлап ебәреүселәрҙең береһе, революцион-демократ, политик юлбашсы, революцион трибун, пропагандист, бөйөк гуманист, реалистик эстетиканы һәм әҙәби тәнҡитте башлап ебәреүсе, ҡайнар патриот.

Бынан бер быуат элек В. Г. Белинский үҙенең алыҫ киләсәктәге улдары — беҙҙең быуын тураһында былай тип яҙҙы: «Ан-бешмле донъяның башында тороусы, фәнгә лә, искусствоға ла законлар биреүсе һәм барлыҡ аҡлы кешелек тарафынан бөтә йөрәктән булған хөрмәт ҡаҙанған Россияны 1940 йылда күрәсәк ейәндәребеҙ һәм уларҙың ейәндәренә көнсебеҙ ҡыҙа». Сөнки ул үҙе йәшәгән осор — Россияла феодализмдең серей, капитализм элементтәренең көсәйә барған мәлендә, башҡа бик күп замандаштары һымаҡ, буржуаз просветитель булып ҡына ҡалманы. Һис шикһеҙ, Белинский капитализмдең феодаль-крепостной ҡоролошҡа ҡарағанда ҙур алға китеш икәнлеген аңланы; ләкин шул уҡ ваҡытта ул, бөйөк материалист-философ һәм социолог булараҡ, капиталистик ҡоролоштоң бөтә сирҙәрен дә асыҡ күрә алды. «Капиталистар ҡулында булған государство — ҡайғы государствоһы» тине ул әсенеп. «Социализм идеяһы» уның өсөн «идеяларҙың идеяһы... мәсьәләләрҙең мәсьәләһе» булып әүерелде. Ул «байҙар ҙа, ярлылар ҙа, батшалар ҙа һәм уларҙың буйһоноусылары ла булмаясаҡ, ләкин туғандар буласаҡ, кешеләр буласаҡ» общество төҙөләсәген алдан күрә алды һәм уның өсөн һуңғы һулышынаса аяу белмәй көрәште.

Белинскийҙең донъяға материалистик ҡарашынан, уның эшмәкәрлегенең дөйөм юнәлешенән сығып, В. И. Ленин уны рус социал-демократияһының предшественниге (алдан килеүсеһе) тип атаны. Билдәле, эшләп сығарыу көстәре бик түбән саҡта пролетариаттың революцион синыф булараҡ формалашмаған Россия феодаль-крепостной ҡоролош шарттарында Белинский ғилми социализм идеялары юғарылығына күтәрелә алманы. Һәм ул общество үҫешенең төп этәргес көсө булған синыфи көрәште лә аңлай алманы. Уның материализме диалектик һәм тарихи материализм түгел ине. Ләкин, шул уҡ ваҡытта, ул тормошто яңыртып ҡороуҙың фәҡәт революцион һикерештәр аша ғына мөмкин буласағын күрһәтте. Уның аңлауынса, бындай яңыртып ҡороуҙың «үҙенән-үҙе, ваҡыт үтеү менән, көслән яһалған переворотларһыҙ, ҡанһыҙ яһалыуы мөмкин тип уйлау көлкө» бер эш. Шулай итеп ул, объектив рәүештә, революцион хәрәкәттәргә өндәүсе трибун булды.

Үҙенән-үҙе асыҡ, ул ваҡыттағы тарихи шарттарҙа Белинскийгә үҙенең эшмәкәрлегенең башынан уҡ революцион демократ булып китеү мөмкин түгел ине. Уның философик, тарихи һәм эстетик ҡараштарының үҫеү юлы урау булды. Уның донъяға ҡарашы көнбайыш идеалистик философияһын еңеп сығыу, һуңынан уға ҡаршы көрәшеү нигеҙендә үҫте, күтәрелде.

В. Г. Белинский разночинец (төрлө ваҡ чиндар төркөмө) семьяһында тыуған. Уның атаһы флотта врач булып эшләгән; һуңынан, Виссарион 6 йәштә сағында, ул хәрби хеҙмәттән сығып, провинцияла йәшәй башлай. Белинский балалыҡ көндәренән үк ауыр бәлгәнлек шарттарында үҫә. Ярым ас йәшәү, уратып алған провинция тормошоноң ауыр картиналары уның аңында торан яралы эҙ ҡалдыралар һәм батша Россияһының аяуһыҙ мөһинбарлығына ҡаршы килешмәҫлек дошманлыҡ тойғолары уяталар. Гимназияла уҡыған мәлендә үк замананың алдынғы тәнҡитселәренән һаналған Полевой, Надеждиндарҙың мәҡәләләрен, Рылеев һәм Пушкин кеүек шағирҙарҙың ирклек тураһындағы әҫәрҙәрен уҡыу был тойғоларҙы тәрәнәйтә, бөтә крепостной ҡоролошҡа ҡарата күрә алмау хистәре тәрбиәләй. Мәскәү университетенда уҡыған осорында А. И. Герцен, Н. П. Огарев, Н. В. Станкевич кеүек, йәшән килгән социаль-экономик ҡоролошҡа оппозицияла торған прогрессив рухтағы студенттәр менән тығыҙ бәйләнешә, философик һәм эстетика мәсьәләләрен өйрәнеүсе Станкевич түңәрәгендә актив ҡатнаша. Бында донъяға, әҙәбиәткә, искусствоға һәм философияға дөйөм ҡараштар эшләнә. Түңәрәк члендәре араһында Белинский үҙенең аҡыл көсөнөң, тойғоларының тәрәнлеге һәм революцион фекерле булыуы менән ныҡ айырыла. Уның әҙәби эшмәкәрлегенең башланғысы булған «Дмитрий Калинин» пьесаһы был яҡтан бик характерле. Белинский был әҫәрен 1831 йылда, 20 йәштә сағында, яҙа. Пьесаның төп геройы Дмитрий Калинин крепостниктәргә, личностең иҙелеүенә ҡаршы протест рухы менән һуғарылған кеше. Бындай пьеса яҙған өсөн, «ышаныслыһыҙ кеше» рәтенә индерелеп, Белинский университеттан ҡыуып сығарыла, бөлгөнлөк, хәйерселек иркенә ташлана.

Бына ошондай шарттарҙа үҫкән, тәрбиәләнгән Белинский өсөн философия тар фән өлкәһе генә түгел, ә бик ҙур политик әһәмиәткә эйә булған мәсьәлә була. Уның философияһы, үҙенең юнәлеше менән, тәүҙә үк тормош менән, крепостной правоға ҡаршы көрәш, демократия өсөн көрәш менән бәйләнгән. Шуға күрә ул бер ваҡытта ла пассив күҙәтеүсе генә булмай. Был яғы менән ул немец идеалистарынан бик ныҡ айырыла. Идеалистик позицияла тороп яҙған тәүге мәҡәләләренең үк береһендә Белинский «идея өсөн тыныслыҡ юҡ: ул туктауһыҙ йәшәй, йәғни емерер өсөн туктауһыҙ ижад итә һәм ижад итер өсөн емерә»—тип яҙа.

В. Г. Белинский, университеттан сығарылғандан һуң, 1832—1833 йылдарҙа, профессиональ әҙәбиәтсе булып китә, әҙәбиәт тәнҡитсеһе эшмәкәрлеген башлай. Замананың алдынғы органдары һаналған «Молва» һәм «Телескоп» (1834—1836), «Московский наблюдатель» (1838—1839), һуңынан «Отечественные записки» һәм «Современник» журналдарында тәнҡит бүлектәрен алып бара. 1834 йылда «Молва» журналында уның тәүге ҙур хеҙмәте булған «Әҙәби өмөтләнеүҙәр. Прозалағы элегия» тигән мәҡәләһе баҫылып сыға. Был мәҡәлә рус тәнҡитендә яңы осор аса. Дөрөҫ, йәш тәнҡитсе бында бик күп һәм сериоз идеалистик хаталар яһай. Ләкин был мәҡәләлә ул, рус тәнҡитендә беренсе булып, халыҡ һәм халыҡсанлыҡ мәсьәләһен ҡуя һәм диалектик фекерҙәр әйтә: «...Тормош ул — хәрәкәт итеү, ә хәрәкәт итеү — көрәш ул».

1835 йылда Белинский үҙенең икенсе ҙур хеҙмәтен—«Рус повесе һәм Гоголь повестәре тураһында» тигән мәҡәләһен тамамлай. Бында уның философик һәм эстетик ҡараштарында реалистик тенденцияларҙың үҫеүе күренә. Был мәҡәләлә Белинский тарафынан реаль поэзия исын «беҙҙең заман поэзияһы, тормош поэзияһы, ысынбарлыҡ поэзияһы» итеп иғлан ителә. Шулай итеп, йәш тәнҡитсе реализм талаптарын бөтә юғарылығына күтәрә һәм оҙаҡламай уның был хаҡтағы фекерҙәре тулы бер учениеға әйләнә.

1841 йылдарҙа Белинский үҙенең философияһында идеалистик ҡараштарҙан бөтөнләйгә һәм ҡырҡа ҡотола, үҙ тәнҡитенең үткер утын Гегель философияһының прусс монархияһының яҡлаусыһы, феодализмдең әшәке ҡалдығы булғанлығын фаш итеүгә юнәлтә. «Беҙ аҡыллы хөкүмәттең идеалын күрергә теләгән прусс хөкүмәте шап булып сыҡты. Азатлыҡҡа, аҡылға ҡаршы палачтарҙың тройственный союзы члене. Бына һиңә Гегель!».

1841—1848 йылдар — Белинский талантының иң сәскә атҡан осоро. Был осорҙа ул үҙ заманының тарихи талаптарын асыҡ төшөнә; уның ҡырыҡынсы йылдарҙа яҙған мәҡәләләре, очерктәре һәм хаттары: кеше хоҡуҡы өсөн көрәш, донъяны революцион юл менән ҡайтанан ҡороу идеяһы менән һуғарылғандар. Ул тулыһы менән материализм һәм революцион демократизм позицияһына күсә; кеше азатлығын яҡлаусы, социализм идеяларын пропагандалаусы, кешенең кеше тарафынан иҙелеүенә ҡаршы революцион көрәшкә өндәүсе трибунға әйләнә.

«Рус әҙәбиәте тураһында уйҙар һәм заметкалар» (1846) тигән мәҡәләһендә ул: «Беҙҙең әҙәбиәт ниндәй генә булмаһын... беҙҙең бөтә аҡыл тормошобоҙ һәм беҙҙең тормошобоҙҙоң бөтә поэзияһы фәҡәт унда ғына», ти.

Ошо айҡанлы әҙәбиәткә булған талаптар ҙа үҫәләр. Белинский үҙенең көрәшсе дәртенең барлыҡ ҡайнарлығы менән «саф искусство», «искусство—искусство өсөн» кеүек яһалма ҡараштарға ҡаршы аяуһыҙ көрәш башлай. «Рифмаланған шалтырауыҡлы уйынсыҡтар заманы кире ҡайтмаҫҡа китте,—тип яҙҙы ул 1846 йылда, — нескә хисләнеүҙәр, ваҡ тойғолар бер нәмә тормайҙар: улар урынына художестволы формала әйтелеп бирелгән тәрән той-

(Аҙағы 4-се биттә).

СОВЕТ-АМЕРИКА МӨНӘСӘБӘТТӘРЕНӘ КАРАТА СИТ ИЛ МАТБУҒАТЫНЫҢ ОТКЛИКТӘРЕ

АҠШ

НЬЮ-ЙОРК, 23 май. (ТАСС). Газеталар Совет-Америка мөнәсәбәттәре турағында Государство Департаментенең 11 пункттан торған белдереүенә карата, ТАСС-тың белдереүенә әлегә тиклем комментарийҙар бирмәнеләр. «Нью-Йорк таймс» газетаһы үҙенең беренсе битендә «Советтәр Союзы ике держава араһындағы бөтә фекер айырымлыҡтары өсөн Ҡушма Штаттарҙы ғәйепләй» тигән баш менән ошо белдереүгә карата мәҡәлә баҫып сығарҙы. «Нью-Йорк таймс» газетаһы шулай уҡ ТАСС-тың белдереүенән ҙур ғына өҙөктәр баҫып сығарҙы. Ассошиэйтед Пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһе Хайтауэр, Государство Департаменте ТАСС-тың белдереүенә «комментарийҙар биреүҙән баш тарта» тип хәбәр итә.

Уоллестең радио аша яһаған сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 24 май. (ТАСС). Спокане (Вашингтон штаты) калаһынан радио аша сығыш яһап, Генри Уоллес Совет-Америка фекер айырымлыҡтарын тыныс юл менән регулировать итеү турағында Совет тәҡдимдәрен Ҡушма Штаттарҙың бер нисә тапҡыр кире ҡағыуын «аятһыҙлыҡ» тип атаны. Уоллестең Асыҡ хатына И. В. Сталин биргән яуапка һәм Смит менән В. М. Молотов араһында ноталар алышыуға айырыуса туҡталып, Уоллес былай тине: «һөйләшеүҙәрҙән баш тартыусы һәм регулировать итеүгә өлгәшергә ынтылмаусы хөкүмәттең аҡланыуҙары көсһеҙ генә түгел, оятһыҙ ҙа булып тора». Трумэн, Маршалл һәм Ванденберг «рустарҙан ҡурҡмайҙар, ләкин, — ти Уоллес, — әгәр ҙә ваҡиғаны бөтә кешегә белдереү прожекторы беҙҙең ҡулдарыбыҙҙы Ҡытайҙағы, Грециялағы һәм Палестиналағы ғәйепһеҙ кешеләрҙең ҡанына буяусы политикаһының әҙемтәләрен яҡтыртһа, улар Америка халҡының реакцияһынан ҡурҡасаҡтар, тип уйлайым».

Халыҡтарҙың «һыуыҡ һуғыш» тамамланыуға булған ышаныстарына «һыуыҡ һыу һипкән» ике партиялы политиктәрҙе әлеккесә тәнҡитләп, Уоллес түбәндәгеләрҙе белдерҙе: «Беҙ был нәмәләр турағында әлек һөйләнек инде, һәм беҙ һөйләүҙән арыныҡ, тине хөкүмәт. Ләкин халыҡ, беҙ был нәмәләр өсөн әлек көрәштек һәм беҙ көрәшеүҙән арыныҡ инде. Беҙ тыныслыҡ теләйбеҙ тип белдерә».

Шунан ары Уоллес Ванденбергте йәки Маршаллды, йәки Техас штатының сенаторы демократ Конналиҙе Ҡушма Штаттарҙың тышҡы политикаһы турағында халыҡ алдында алып барыласаҡ 10 тапҡыр бәхәс итеүгә ҡатнашырға саҡырҙы.

Уоллестең Портлендтә яһаған сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 26 май. (ТАСС). Ассошиэйтед пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Портлендтән (Орегон штаты) хәбәр итеүенә ҡарағанда, Уоллес үҙенең сығышында, тышҡы политика мәсьәләләрен тикшергән ваҡытта государство секретаре Маршалл һәм сенаторҙар Ванденберг һәм Коннэли алған позицияларға ҡаршы сығыш яһап, былай тип белдергән: «Американың тышҡы политикаһын ентекле рәүештә тикшерергә ваҡыт килеп етте. Был политиканы матбуғат тулыһынса яҡтыртмай. Һуңғы ике аҙна эсендә рустар һыуыҡ һуғышты туҡтатыу өсөн һөйләшеүҙәр алып барыуға үҙҙәренең теләүҙәре турағында ике тапҡыр белдерҙеләр. Был — Американың бер генә принцибына лә һәм общественный интересына лә зыян килтермәйенсә, өлгәшергә мөмкин булған тыныслыҡ. Уоллестең һүҙҙәренә ҡарағанда, «контролһеҙ булған бик эре корпорациялар үҙҙәренең көслө һәм тәкәббер булыуҙары менән кигеҙҙә үҙҙәре тарафынан уйланып сығарылған «Ҡыҙыл ҡурҡыныс» һылтауы аҫтында традицион американизмде һәләкәткә илталәр». Уоллес шунан ары: «пушкалар түгел, ә һабандар, хәрби миссиялар түгел, ә медицина миссиялары, емереү түгел, ә төҙөлөш, хәрби һөжүм түгел, ә тыныслыҡ», — яуап бына шундай булырға тейеш тип белдергән.

АВСТРИЯ

ВЕНА, 26 май. (ТАСС). «Эстеррейхише фэлькештимме» газетаһы, АҠШ государство департаментенең 19 майҙа яһаған белдереүенә ҡарата совет етәксе крутгарының мөнәсәбәте турағында ТАСС белдереүенә комментарийҙар биреп, былай тип яҙа: «Мәскәүҙә шундай белдереү иғлан ителде. Был белдереүҙә, халыҡ-ара хәлдең көсөркәнешле булыуы өсөн Американың политикаһы яуаплы, тип күрһәтелә. Америка сит ил эштәре министерствоһының ҡаршылыҡ тыуҙырыусы раҫлауҙарының пункттары берһе артынан икенсеһе кире ҡағыла. Мәскәү белдереүе, Америка хөкүмәте халыҡ-ара договорҙарҙы систематик рәүештә боҙоп килә, тип күрһәтә».

«Винер цейтунг» газетаһы ТАСС белдереүенең тулы йөкмәткеһен яҙып сыға.

АВСТРАЛИЯ

СИДНЕЙ, 26 май. (ТАСС). Бөтә профсоюз матбуғаты Австралия горняктәре федерацияһының Үҙәк советы тарафынан ҡабул ителгән резолюцияны иғлан итте. Был резолюцияла былай тип әйтелә: «Австралия горняктәре федерацияһы Америка менән Советтәр Союзы араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу маҡсатында Советтәр Союзының Америка менән һөйләшеүҙәр башларға әҙерләген ҡотлай. Беҙ быны, тыныслыҡты һәм азатлыҡты нығытырға ярҙам итеүсе Советтәр Союзының халыҡ-ара эштәрҙә башҡарған конструктив роле артабан нығытылаһыуы итеп ҡарайбыҙ».

ЧЕХОСЛОВАКИЯ

ПРАГА, 26 май. (ТАСС). Прага газеталары АҠШ государство департаментенең 19 майҙа яһаған белдереүенә ҡарата ТАСС белдереүен ҙур баш аҫтында беренсе биттәргә урынлаштырҙылар. ТАСС белдереүендәге, Американың хәҙерге хакимлек итеүсе круггары хәҙер килеп тыуған көсөркәнешле халыҡ-ара хәл өсөн яуаплы булып торалар, тигән нигеҙле һығымтаһын матбуғат айырыуса билдәләй.

БЕРЛИН

БЕРЛИН, 25 май. (ТАСС). Берлиндең совет секторында иртән сыға торған бөтә газеталар 25 май номерында АҠШ Государство Департаментенең 19 майҙа яһаған белдереүенә ҡарата ТАСС белдереүенә төп иғтибарҙы бүлделәр.

Көнбайыш секторҙарҙа сыға торған газеталарҙан Франция лицензияһы менән генә сыға торған «Дер курир» газетаһы 24 май номерында һәм Америка газетаһы «Дер тагесшпигель» ТАСС белдереүенең ҡыҫҡаса йөкмәткеһен баҫып сығаралар.

Әлек АҠШ государство департаментенең белдереүен тулыһынса яҙып сыҡҡан «Дер социал-демократ», «Телеграф» һәм «Дер абенд» кеүек газеталар ТАСС белдереүе турағында әлегә тиклем бер генә һүҙ ҙа яҙманылар.

Берлиндең совет секторындағы булһын, шулай уҡ көнбайыш секторҙарындағы булһын бер генә газета ла әлегә үҙенең комментарийҙарын бирмәй әле.

Финляндия хөкүмәтенең кайтанан төҙөлөүе

ХЕЛЬСИНКИ, 26 май. (ТАСС). «Хельсингин саномат» газетаһы, бөгөн государство советы менән бергәләп үткәргән ултырышында республика президенты әлекке мәғариф эштәре министры Эйно Кильпиҙе — эске эштәр министры итеп, әлекке социаль эштәр министры Хельясты — мәғариф министры итеп, Сейм депутаты Пелтоненде — социаль эштәр министры итеп, Херту Куусиненде портфелһеҙ министр итеп билдәләгән, тип белдерә.

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

НЬЮ-ЙОРК, 24 май. (ТАСС). Ассошиэйтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Иерусалимдән хәбәр итеүенә ҡарағанда, ғәрәп легионы артиллерия орудиеләренән Иерусалимға туҡтауһыҙ рәүештә ата. Һуңғы аҙнала ҡалаға 300 снаряд атылған, 18 кеше үлтерелгән һәм 100 кеше яраланған. Ғәрәптәр аҡрынлап был районды емерәләр. 1.500 еврей ауыр хәлдә, ләкин терелеүҙәре мөмкин.

Юнайтед Пресс агентствоһының хәбәрсеһе Иерусалимдән, еврейҙәрҙән алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, Вифлеемда Иерусалимға атака яһау өсөн Египет ғәскәрҙәре ғәрәп легионы менән ҡушылған, тип хәбәр итә. Палестиналағы һуғыштың бөтә осоронда беренсе тапҡыр еврейҙәр артиллерияны хәрәкәткә килтергәндәр һәм Тивериад күле янында тупланған Сирия ғәскәрҙәренә һәм ғәрәп легионы частәренә ауыр ударҙар яһағандар. Египет частәре Хасал Нирамда һәм Ял Мордехайҙағы (Неджеб) водопроводный станцияларға атака яһағандар. Еврей ғәскәрҙәренең штабы, еврей отрядтәре Хайфының көньяғыраҡ урынлашҡан Тантур портын алдылар һәм бер нисә йөҙ ғәрәпте пленға алдылар.

ЛОНДОН, 24 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы, ғәрәптәрҙән алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, Иерусалимдең боронғо өлөшөн һаҡлаусылар әлегә тиклем ҙур ҡаршылыҡ күрһәтәләр, тип хәбәр итә.

Ирак хәрби командованиеһе, Ирак самолеттары Тивериад күленән көньяғыраҡ Иордан йылғаһы буйындағы еврей ауылдарын бомбаға тоттолар, бер нисә урында пожар булды һәм ҙур емереүҙәр яһалды, тип хәбәр итә.

Яңы Иерусалимдең Дамасск һәм яңы ҡапҡалар араһындағы районда еврейҙәр тарафынан алынған ерҙә кисә бик ҡаты һуғыш хәрәкәттәре булған.

Ғәрәп легионының артиллерияһы яңы Иерусалимдәге еврей позицияларын көслө рәүештә бомбаға тота башлаған.

Палестинаның көньяғында Египет ғәскәрҙәре һәм ғәрәп легионы Вифлеем менән Иерусалим араһындағы Рамат-Рахиль ауылын алғандар.

ЛОНДОН, 24 май. (ТАСС). Рейтер агентствоһы хәбәрсеһенең Кипр утрауынан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Англияның ошо утрауҙа урынлашҡан хәрби-һауа көстәрен тулыландырыу өсөн кисә бында Никозия аэродромына «Спитфайр» маркалы 10 самолет килгән. Улар Палестинала хәрәкәт итәсәктәр, тип уйланыла.

Һүрәттә: Өфөнөң Луначарский исемендәге баксаһы. Алғы планда 5-се мәктәптең 6 «А» класында уҡыусы дуҫтар — Тамара Фролова, Венера Туктарова һәм Аля Петрова — тарихтан уҡыу йылын … кабатлайҙар. Г. Буравин фотоһы.

Йәйге һауыҡтырыу эштәренә әҙерлек

Комсомолдың Октябрьск кала комитеты быйыл пионерҙар лагерен байтаҡ киңәйтеү сараһын күрә. Уҙған йыл лагерҙа 900 бала булғанһа, ә быйыл 1.500 уҡыусы ял итәсәк.

Лагерҙә кала уҡыусылары, пионерҙарҙың культуралы ял итеү талаптарына яуап бирерлек итеп ойоштороуға бөтә общественный ойошмалар һәм предприятиеләр яҡындан ҡатнашалар. Беренсе номерлө төҙөлөү управлениеһе лагерь территорияһында яңы йорт һалып, ашхана залын 500 бала ныҡлы итеп киңәйтә һәм физкультура майҙаны яһай. Торлаҡтөҙөлөш конторалары лагерҙа ремонт үткәрә. Электромонтаж, төҙөлөш-монтаж конторалары, сау… ҙа һәм профсоюз ойошмалары … киноустановкалар… дио, яҡтылыҡ менән тәьмин … һәм төҙөлә. Ял итәсәк балалар … бер уҡ … 1.500 … әҙерләнә. Ял итеүселәрҙе … жалыҡтар лагерҙе … ҙеләр.

Беренсе партия 5 июндә … килә. Быйыл 500 бала …

Бынан башҡа кала … лалар майҙансығы асыла … кенә пионерҙар һәм уҡыусы … үҙҙәренең уҡытыусылары … сығырҙар.

М. Кауркина.

Театр колхоз баҫыуҙарында

Республиканың колхоз-совхоз театрҙары, Башҡорт государство филармонияһының концерт һәм хор бригадалары яҙғы сәсеүҙә колхозсыларҙы хеҙмәтләндереү өсөн һәр береһе айырым маршрут менән районларға сығып китте. Бөрәй колхоз-совхоз театры артистары кәсә менән районлы 24 колхозында 14 меңгә яҡын колхозсыны хеҙмәтләндерҙе. Ауырғазы театры 11 спектакль ҡуйып, 2 мең яҡын колхозсыны, Ҡыйғы театры 12 спектаклдә 1,5 мең колхозсыны. Дүртөйлө театры … мең колхозсыны. Учалы театры … меңгә яҡын колхозсыны хеҙмәтләндерҙе. Былардан тыш … театры балалар өсөн ике … такль ҡуйҙы.

Театрҙарҙың, концерт һәм … бригадаларының репертуарҙары яңы пьесалар, инценировкалар … Программа … яҙғы сәсеүгә арналған.

Г. Хәкимов.

Юлдар, күперҙәр төҙөкләндерелә

Хәйбулла районында юлдарҙы, күперҙәрҙе төҙөкләндереү эше алып барыла. Ошо көндәрҙә районда яңынан 4 күпер һалынды. Уның береһе Таналыҡ йылғаһы аша һалынған ҙур күпер.

Колхозсылар юл төҙөү үткәрә. Быйыл районда 200 погонный метр … күпер һалыу һәм 10 километр оҙонлоғонда юл төҙөү … эштәре планлаштырыла.

Ә. Ғафаров.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Бөйөк халыҡтың бөйөк улы

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

ғолар һәм идеялар талап итеҙә... Шағир инде хыялый донъяла йәшәй алмай: ул инде үҙ заманында батшалыҡ иткән ысынбарлыҡтың гражданины...»

Хәҙер инде бөйөк тәнҡитсе ҙур идеялар искусствоһы, общество тормошо менән тәрән бәйләнгән, был тормоштоң алдынан бара торған, халыҡҡа яҡын һәм аңлайышлы искусство мәсьәләһен бөтә бейеклегенә күтәрә. «...Ниндәйҙер саф, донъянан баш тартҡан, фәҡәт үҙ сфераһында ғына йәшәүсе, тормоштоң башҡа яҡтары менән бер төрлө лә алыш-биреше булмаған искусство турағындағы уй — алыҫлаштырылған, хыялый уй. Ундай искусствоның һис ҡайҙа һәм һис ҡасан булғаны юҡ...» («1847 йылғы рус әҙәбиәтенә ҡараш»).

Әҙәбиәттә халыҡсанлыҡты, идея яғынан тенденциялылыҡты яҡлау менән бер рәттән, Белинский әҙәби әҫәрҙәрҙең художество камиллеге өсөн саҡыра, натурализмға ҡаршы көрәшә. Шулай уҡ ул әҙәби образдарҙың типиклеге мәсьәләһен бик серьез ҡуя.

«...Романда йәки повестә образдар һәм хәрәкәт итеүсе кешеләр юҡ икән, характерҙәр, типик булған бер нәмә лә юҡ икән,—тип яҙҙы ул, — унда һөйләнгән барлыҡ нәмәләр натуранан нисек кенә дөрөҫ һәм бөтә ваҡлыҡтары менән күсерелеп алынмаһындар, уҡыусы унда һис бер төрлө табиғилек тапмаясаҡ...».

Һисын тормош менән тығыҙ бәйләнеш киң искусствоға йән бирә, уны халыҡҡа яҡын һәм кәрәкле яһай. Белинский бына шундай һәҙәмтәгә килә.

Белинский реалистик әҙәбиәттең төп эстетик принциптәрен бик тәрән, төплө һәм күп яҡтан эшләп сығарҙы. Ул — әҙәбиәткә массаларҙы ирекле, бәхетле тормош өсөн көрәшкә саҡырыусы, өндәүсе трибуна, тип ҡараны. Былай тип яҙҙы ул: «Искусствонан общественный интерестарға хеҙмәт итеү хоҡуҡын тартып алыу — уны күтәреү түгел, ә түбәнһетеү тигән һүҙ, сөнки был — уның иң йәнле көсөн, йәғни фекерен алыу, уны ниндәйҙер һимергән кешеләрҙең ләззәтләнеү әйберенә, эшләмәй йәшәүсе ялҡауҙарҙың уйынсығына әйләндереү, тигән һүҙ».

«Белинскийҙән башлап, революцион-демократ рус интеллигенцияһының бөтә иң яҡшы вәкилдәре «саф искусство», «искусство — искусство өсөн» тип йөрөтөлгән нәмәләрҙе танымаһылар һәм халыҡ өсөн булған искусствоны, уның юғары идеялылығы һәм общественный әһәмиәтен өндәүселәр булдылар» (А. Жданов).

Бөйөк тәнҡитсе рус яҙыусыларына юл һыҙып бирҙе, ошо юл менән барып, 19-сы быуаттың һуңғы яртыһында рус әҙәбиәте бөтә донъяла иң бөйөк әҙәбиәткә әйләнде.

В. И. Ленин Белинскийҙе бик юғары баһаланы һәм уның хеҙмәттәренең рус революционерҙаренең бер нисә быуындарын идея яғынан формалаштырыуҙа тотҡан ролен асып бирҙе. «...Алдынғы көрәшсе ролен тик алдынғы теория тарафынан етәкләнгән партия ғына башҡара ала, — тип күрһәтте Ленин. — Ә быны иң тигән һүҙ икәнлеген аҙмы-күпме конкрет рәүештә күҙ алдына килтереү өсөн уҡыусы Герцен, Белинский, Чернышевский һәм 70-се йылдар революционерҙаренең гүзәл плеядаһы кеүек, рус социал-демократияһының предшественниктарен хәтерләһен; хәҙер рус әҙәбиәтенең ниндәй бөтә донъя әһәмиәтенә эйә булыуы хаҡында уйлаһын...»

В. Г. Белинский хеҙмәттәренең әһәмиәте рус общественный хәрәкәтендә уйнаған роле менән генә лә сикләнмәй. Уның эшмәкәрлеге бөтә донъя әһәмиәтенә эйә. Сөнки ул «Германия һәм Францияла официаль тарихи фән тарафынан тыуҙырылғандарҙың бөтәһенән дә сикһеҙ юғары торған рус әҙәбиәтендәге тарихи һәм критик мәктәптең» (Энгельс) нигеҙ һалыусыһы булды.

Белинский — үҙ иленең бөйөк патриоты ине. Ул, бер яҡтан, крепостник-помещиктарҙың «квас» патриотизменән әсе көлдө. Икенсе яҡтан, «белемле» дворянствоның, көнбайышсыларҙың космополитик тенденцияларына ҡаршы көрәште. Бындай реакционерҙарға ҡаршы былай тип яҙҙы ул: «Беҙ инглиздар ҙа, француздар ҙа, немецтәр ҙә булырға тейеш түгелбеҙ һәм була ла алмайбыҙ, сөнки беҙ рус булырға тейешбеҙ». «...Сөнки беҙҙең үҙебеҙҙең тәрән, көҙәтле, оригиналь милли тормошобоҙ бар». Ләкин, шул уҡ ваҡытта, Белинский бөтә кешелек донъяһы эшләп сығарған культура байлығын үҙләштерергә, үҙ культура хазинаһын артабан байытыу өсөн файҙаланырға саҡырҙы.

«Ярһыулы Виссарион» бөгөнгө көндә лә беҙҙең идея көрәшсебеҙҙә юлдашыбыҙ һәм сорагнигебеҙ булып ҡала. Уның искусствоның тормош менән тығыҙ бәйләнгән, общественный юнәлештә булырға тейешлеге турағындағы фекерҙәре хәҙер беҙгә әҙәбиәттә социалистик реализм методын, социалистик эстетика мәсьәләләрен эшләү, үҫтереүҙә, совет яҙыусыларының ижад практикаһында бик ҙур урын тоталар. «Совет әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияһы, — ти иптәш Жданов, — XIX быуат рус әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияларының, беҙҙең бөйөк революцион демократтарыбыҙ — Белинский, Добролюбов, Чернышевский, Салтыков-Щедрин тарафынан тыуҙырылған, Плеханов тарафынан дауам иттерелгән һәм Ленин менән Сталин тарафынан ғилми эшләнгән һәм нигеҙләнгән традицияларҙың дауамы».

Был бөйөк традициялар хәҙерге көндә СССР-ҙа йәшәүсе барлыҡ халыҡтарҙың да, шул иҫәптән башҡорт халҡының да, формаһы яғынан милли, йөкмәткеһе яғынан социалистик культураларын сәскә аттырыуға, бөтә донъяла иң идеялы, иң юғары культура итеп күтәреүгә хеҙмәт итә.

Бына ни өсөн бөйөк рус халҡының бөйөк улы Виссарион Григорьевич Белинскийҙең юбилейе барлыҡ совет халыҡтары тарафынан оло хөрмәт менән билдәләнә.

Ғәйнан Әмири.

Башҡорт АССР-ы һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорт управлениеһе Йоматау неврологик санаторийенә, Красноусольск һәм Янғантау бальнеологик санаторийҙаренә 1948 йылға ПУТЕВКАЛАР ҺАТА.

Ағымдағы йылдың сезонында был санаторийҙарҙе төҙөкләндереү һәм йыһазландырыу буйынса күп кенә саралар үткәрелде, Йоматауҙа май айынан алып ҡымыҙ менән дауалау башланасаҡ.

Путевкалар профсоюздарға, предприятиеләргә, учреждениеләргә һәм шулай уҡ курортҡа ебәреү комиссияһының заключениеһе булған айырым кешеләргә һатыла.

Путевкаларҙың хаҡы түбәндәгесә: Йоматау санаторийенә — 1200 һум, Красноусольск һәм Янғантау санаторийҙаренә 900 һум.

Путевкалар алыу турағындағы ғаризалар менән мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы 106-сы номерле йорт, 5-се ҡат, 207-се номерле бүлмә, Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының курорттар управлениеһе.

ҮҘЕҢДЕ СТРАХОВАТЬ ИТЕҮ

16 йәштән алып 60 йәшкә тиклем булған граждандар, врачтан сәләмәтлек турағында таныҡма алып, 10, 15 йәки 20 йыл срокҡа, шулай уҡ 50, 55, 60 һәм 75 йәшкә тиклем страховать ителә алалар.

Теләһә ниндәй суммаға страховать ителергә мөмкин.

Страховать ителеү срогы тулған, йәки берәр төрлө бәхетһеҙлеккә осрап хеҙмәткә һәләтлелекте юғалтҡан ваҡиғала, страхование суммаһы страховать ителгән кешенең үҙенә, ә страховать ителеүсе үлгән ваҡиғала — страховой документта күрһәтелгән кешегә түләнә.

Страхование взносының күләме страховать ителеүсенең йәшенә, страхованиеның срогына һәм страховой взностәр индереү осорона ҡарап түләнә.

Страховать ителеүгә (аҙ ғына өҫтәмә взнос иҫәбенә) пенсияны страховать итеүҙе өҫтәргә мөмкин. Быны буйынса, Госстрах, страховать ителеүсе үлә ҡалһа, страхование суммаһын түләү менән бер рәттән, пенсияны страховать иткән срок бөткәнгә тиклем, һәр йыл һайын страховой суммаһының 10 проценте күләмендә пенсия түләй.

Белешмәләр алыу өсөн Госстрах инспекцияһына йәки страховой агентҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Башгосстрах.

Инвалидтәр артеле — «Труд инвалидов» бөтөрөлә.

Дәғүәләр менән 1948 йылдың 10 июненә тиклем ликвидкомға мөрәжәғәт итергә.

Ликвидкомдың адресе: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 4-се номерле йорт, инвалидтәр артеле бинаһы — «Надомник».

Күрһәтелгән сроктан һуң дәғүәләр ҡабул ителмәйәсәк.

Ликвидком.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00153. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 106 29 май шәмбе

Хаҡы 20 тин

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөтә тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көстәрен тулы нагрузка менән файҙаланып, яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауҙы тәьмин итәйек! (1-се бит).

Промышленность предприятиеларе һәм транспорттың рентабелле эшләүҙәренә өлгәшергә. (2-се бит).

АГИТАТОРҒА ЯРҘАМҒА. З. Вахитов.—Ауыл хужалығы алдынғылары ниндәй уңыштары өсөн Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән наградланалар. (2-се бит).

Ә. Йомағужин. — Башҡорт телендә бөйөк юлбашсыларының әҫәрҙәре. (2-се бит).

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советында. Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа пар һөрөү барышы тураһында. (2-се бит).

Яр. Вәлиев. — Унған егет. (3-сө бит).

Ә. Бикчәнтәй. — Әлфиә. (3—4-се биттәр).

Беҙҙең республика. (4-се бит).

Греция хөкүмәтенең ауыбы хәкимлек түгел тип табылды. (4-се бит).

Израиль государствоһы президентенең белдереүе. (4-се бит).

Промышленность предприятиеларендә партия-политик эште көсәйтергә

Илебеҙҙең экономик ҡеүәтен артабан нығытыуға, хеҙмәтсәндәрҙең материаль көн-күреш шарттарын тағы ла яҡшыртыуға юнәлдерелгән сталинсе яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн көрәш — бөтә совет халҡының иң ҙур бурысы. Ленинградлыларҙың патриотик саҡырыуына ҡушылып, республикабыҙҙа промышленность предприятиеларының күпселеге биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшә. Улар йылдан-йыл валовой продукция сығарыу планын айҙан-айға арттырып үтәйҙәр.

Промышленность предприятиеларенең был уңыштары, бөтәһенән элек, унда партия ойошмаларының эшселәр һәм инженер-техник работниктар араһында алып барған ғәйәт ҙур политик-массовый эштәренең һөҙөмтәһе булып тора. Башҡортостан промышленностеның алдынғы тармағы булған нефть промышленносе предприятиеларенең партия ойошмалары нефтселәр араһында политик-массовый эште һуңғы айҙарҙа бик нык яҡшырттылар. Миҫал өсөн «Ишимбайнефть» тресының 1-се промыселен алайыҡ. Бында партия ойошмаһы партия-политик эште Башҡортостан нефтселәренең бакулылар менән социалистик ярышта алған йөкләмәләрен үтәү өсөн көрәшкә эшселәрҙе, инженер-техник работниктарҙы бөтә көсөн мобилизациялау эшенә юнәлдерә. Промысел директоры Славинский, партия ойошмаһы секретаре Нәзиров, өлкән инженер Травницкий иптәштәр һәм башҡа яуаплы работниктар эшселәр алдында систематик рәүештә политик докладтар менән сығыш яһайҙар. Агитаторҙарҙың семинарҙары айға ике тапҡыр үткәрелә. Улар нефть промышленносындағы Социалистик Хеҙмәт Геройҙарының, ордендарҙы һәм башҡа алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен популярлаштырыу, рентабелле эшләү, электр энергияһын экономиялау һәм башҡа шундай производство темаларында әңгәмәләр үткәрәләр.

Шулай уҡ, республикабыҙҙағы күп кенә предприятиеларҙың партия ойошмалары, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең «Сталинград партия ойошмаһында агитаторҙарҙың эшләүендәге етешһеҙлектәр һәм был эште яҡшыртыу саралары тураһында» ҡарарын етәкселеккә алып, агитаторҙарҙың эшен яҡшырттылар. Был партия ойошмалары партия-политик эште хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, продукцияның үҙ хаҡын кәметеү, производство пландарын үтәү өсөн көрәшкә ярҙам итерлек итеп ойошторалар.

Әммә ҡайһы бер партия ойошмалары партия-политик эштең торошона етәрлек иғтибар бирмәйҙәр, эшселәр араһында агитация эшен ойоштороуҙы онотоп, уны осраҡлы сараларға ҡалдыралар. Бындай предприятиеларҙа агитаторҙар эшселәр араһында айҙар буйы сығыш яһамайҙар, ә ҡайһы бер эшселәр улар менән бөтөнләй танышмайҙар.

Мисалға, Ишимбай нефть эшкәртеү заводы агитаторҙары менән партия ойошмаһы тарафынан бер ниндәй ҙә инструктаж үткәрелмәй.

Предприятиеларҙың партия ойошмалары эшселәр һәм инженер-техник работниктар араһындағы политик-массовый эште бөтә эшселәрҙе социалистик ярышҡа тартыу, предприятиеларҙың рентабелле эшләүен тәьмин итеү өсөн көрәшкә юнәлдерергә тейештәр.

Промышленность предприятиеларенең партия ойошмаларының бурысы — һәр бер агитатор, һәр бер пропагандист, һәр бер коммунист эшселәр араһында көндәлек политик эш алып барһын өсөн кәрәкле шарттар тыуҙырыу. Агитаторҙарҙың семинарҙарын айына ике тапҡыр үткәреү, уларға практик ярҙам күрһәтеү, предприятиеларҙағы эштең торошо, производство пландарын үтәү барышы тураһындағы мәғлүмәттәр менән ҡоралландырыу кәрәк.

Хәҙерге ваҡытта предприятиеларҙың партия ойошмаларының эшенә ҙур талаптар ҡуйыла. Улар эшселәрҙе социалистик ярышҡа, етештереүсәнлекте күтәреүгә, производство пландарын үтәү өсөн көрәшкә мобилизацияларға тейештәр. Бының өсөн агитаторҙарҙың эшен ныҡлап ойошторорға, уларҙың сығыштарын йыш ҡына ишетеп торорға кәрәк.

Партия ойошмаларының һәр бер агитаторы марксизм-ленинизм тәғлимәтен, большевистик партияның тарихын өйрәнергә, уны пропагандаларға бурыслы. Шулай уҡ предприятиеларҙың бөтә эшселәрен үҙ-ара ярышҡа тартыу, алдынғыларҙың эш тәжрибәләрен популярлаштырыу, сталинсе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә юнәлдерелергә тейеш.

Партия ойошмаларының бөтә партия-политик һәм агитационно-массовый эштәре — хеҙмәтсәндәрҙе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә мобилизацияларға, республиканың ярышта алған йөкләмәләрен үтәүгә юнәлдерелергә тейеш.

БАССР Министрҙар Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты май айының биш көнлеге йомғаҡтары буйынса яҙғы сәсеү барышының йомғаҡтарын ҡарап, түбәндәге районды, совхозды һәм колхоздарҙы алдынғылар итеп таптылар.

Яҙғы сәсеү планын 86,5 процентҡа үтәгән һәм республикала беренселекте алған Туймазы районында (ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Баранов, райсовет исполкомы председателе иптәш Абдуллин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Садиков) БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байраҡ тапшырылды.

Шулай уҡ БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байраҡтары яҙғы сәсеү пландарын 84—81,5 процентҡа үтәп, республикала икенсе һәм өсөнсө урындарҙы алған Салауат һәм Белорет райондарында ҡалдырылды.

Балтас, Яңауыл, Дәүләкән, Ҡандра, Бакалы, Покровка райондарындағы яҙғы эштәрҙе яҡшы эшләүҙәре билдәләнде.

Совхоздар араһындағы социалистик ярышта Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы беренселекте алды. Бында һабан планы 101 процентҡа үтәлде. БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозында ҡалдырылды.

БашЦИК исемендәге, Туймазы, Аллағуат, «Спартак», Байрамғол колхоздарының биш көнлек эштәре яҡшы эшләүҙәре билдәләнде.

Бөтә тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көстәрен тулы нагрузка менән файҙаланып, яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк тамамлауҙы тәьмин итәйек!

☆ ☆ ☆

Бөтә эш срогынан алда үтәлде

Иәркәй МТС-ының иптәш Талипов етәкселек иткән трактор бригадаһы «Красный фронтовик» колхозында сәсеү башлаған көндәрҙән бирле туҡтауһыҙ эшләй. Тракторист В. Антипин һәм Шутков иптәштәр смена һайын нормаларҙы 120—130 процентҡа үтәйҙәр. Бригада яҙғы һөрөү, культивациялау, тырматыу, сәсеү пландарын арттырып үтәне. Шартлы һәр бер тракторға 177 гектар ер эшкәртелде, 15 көн эсендә 600 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды. Эш сифаты яҡшы, һөрөүҙең тәрәнлеге 20—22 сантиметр.

Тракторҙарҙың яҡшы эшләүе арҡаһында «Красный фронтовик» колхозы яҙғы сәсеүҙә районда алдынғы сафта бара. Ул Илеш район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулында тота.

В. Акимов.

—☆—

Директорҙың вәғәҙәһе һүҙҙә генә ҡалды

Беҙҙең колхозда, йәнле тартыу көстәре аҙ булыу сәбәпле, баҫыу эшенең ҙур өлөшө тракторҙарға төшә. Ҡыйғы МТС-ы менән договор төҙөгән саҡта, директор Фәхретдинов һәм уның политик эш буйынса урынбаҫары Тихомиров иптәштәр:

— МТС һеҙгә ярҙам итер, яҙғы сәсеүҙе договорҙа ҡаралған срокта, 12 эш көнөндә сифатлы итеп үткәрербеҙ, — тип ышандырҙылар.

Ләкин сәсеү башланыу менән уларҙың һүҙҙәре юҡҡа сыҡты. Беҙҙең колхозды хеҙмәтләндергән Вәлиев бригадаһындағы тәгәрмәсле 2 трактор быйыл 109 гектар (уның 50 гектары сиҙәм) ер һөрергә һәм 80 гектар сәсергә тейеш булһа, 20 көн буйына ни бары 40 гектар ер һөрҙө, 30 гектар бойҙай сәсте. Эш сифатына иғтибар ителмәй. Һөрөүҙең тәрәнлеге 16—18 сантиметрҙан артмай.

Тракторҙар насар ремонтланғандар, күп ваҡыт ватылып ултыралар. Ә МТС етәкселәре, механиктәре колхозға килмәйҙәр, тракторҙарҙың эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар.

А. Тәфкалунов.

Ҡыйғы районы «Яңы юл» колхозы председателе.

Һөрөү ойошторолмаған

Ҡырмыҫҡалы районы колхоздары тик иртә культуралар сәсеү өсөн генә 19 мең гектар ер һөрөргә тейеш инеләр. Яҙғы сәсеүҙең иң яҡшы срогтары үтеүгә ҡарамаҫтан, ошо көнгә пландың яртыһы ғына үтәлде.

Ни өсөн бындай тәрән әҙәклек килеп тыуҙы?

Уның сәбәбен «Иҙел» колхозының миҫалында күреп була. Был колхоз, район етәкселәренең әйтеүенә ҡарағанда, алдынғы колхоздарҙың береһе. Колхоздың эш планы буйынса бында иртә культураларҙы сәсеү 7—8 эш көнөндә тамамланырға тейеш ине. Сәсеү башланғанға 25 көн үтеп китте. Ләкин план яртылаш ҡына үтәлде. Ер һөрөү тағы ла насарыраҡ бара. Сәсеүҙең тәүге көндәрендә иртә культуралар тик түңгә һөрөлгән ергә сәселде. Хәҙер ундай ерҙәр бөттө. Ә яҙғы һөрөүҙе ваҡытында ойоштороуға әһәмиәт бирелмәне һәм хәҙер ҙә һөрөү темпын күтәреү өсөн саралар күрелмәй. Шуның арҡаһында сәсеү туҡталып ҡалды. Бында яҙғы сәсеүҙең тәүге 15 көнөндә план буйынса ҡаралған 285 гектар урынына, ни бары 99 гектар ер һөрөлдө. Колхозда хеҙмәт дөрөҫ ойошторолмаған. График буйынса эшләргә тейеш булған 15 һабандың 4—5-е генә эшләй. Улар ҙа көндәлек нормаларҙың яртыһын ғына үтәйҙәр. Эшкә сыҡмаусыларҙың һаны 25—30 процент тәшкил итә. Колхоз председателе иптәш Нафиков сәсеү һәм ер һөрөү эшенә бөтә көстө мобилизовать итеү сараһын күрмәй.

«Игенсе» колхозының председателе иптәш Кипйәбулатов МТС-тың трактор ебәргәнен көтөп, үҙҙәрендәге көстө файҙаланмай, 10 һабандың ни бары икеһе генә ер һөрә. Бында йәнле тартыу көстәре менән ни бары 19 гектар ер һөрөлгән. Сдельщина ҡулланылмай. Сәсеү дүрт аҙна дауам итә, ләкин колхозда кемдең нисек эшләүен, эш нормаһын үтәүен йәки үтәмәүен белмәйҙәр.

«Урал», «Сулпан» колхоздарының да үҙҙәренең тартыу көстәре етерлек. Ләкин был колхоздар ошо көнгә тиклем улар менән бер генә гектар ҙа ер һөрмәгәндәр.

МТС-тарҙың тракторҙар паркы ла баҫыу эштәрендә бик насар файҙаланыла. Күпселек трактористәр смена нормаларын үтәмәйҙәр. Тракторҙарҙың байтаҡ өлөшө яҡтылыҡ булмағанлыҡтан төндә эшләмәй. Тракторҙарға техник тәрбиә һәм бригадаларға ярҙам ойошторолмаған. Күсмә ремонт мастерскойҙары юҡ. Шул сәбәпле тракторҙарҙың тик тороуҙары һуңғы көндәрҙә, сәсеүҙең тәүге көндәренә ҡарағанда, байтаҡ артты. Ҡарламан МТС-ы сәсеүҙең икенсе биш көнлөгөндә 25 процент үҫеш биргән булһа, һуңғы биш көнлөктәрҙә ни бары 13 процент кенә үҫеш бирә.

«Партизан» колхозында иптәш Искәндәров етәкселек иткән трактор бригадаһының тракторы сәсеүгә төшеүҙең тәүге көнөндә үк радиаторы төҙәк булмау сәбәпле стройҙан сыға. Радиаторҙы тиҙ генә төҙәтергә мөмкинлектәр булыуға ҡарамаҫтан, МТС директоры иптәш Михайлов уға капиталь ремонт уҙғарырға бойороҡ бирә. Ләкин был сара ла бик оҙаҡ үткәрелә. Трактор әле лә ремонтта ултыра.

Ҡырмыҫҡалы МТС-ында ла тракторҙарҙың тик тороуҙары 30—35 процентҡа етә.

Күп кенә колхоз етәкселәре тракторҙарҙы тулы файҙаланыу менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Салауат Юлаев исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Илюшенко бригадаһы яғыулыҡ килтереүҙе көтөп 7 сәғәт тик торҙо. «Красный партизан» колхозында иптәш Моҙафаров етәкселек иткән трактор бригадаһы ваҡытында һыу килтерелмәгәнлектән генә биш сәғәт эшләмәне.

Районның етәксе работниктәре сәсеү һәм һөрөү эштәре менән оператив етәкселек итмәйҙәр. ВКП(б) район комитетенең колхоздарға ебәрелгән күпселек вәкилдәре сәсеү барышы тураһында мәғлүмәттәр йыйнау менән генә шөғөлләнәләр. Колхозсыларҙы һәм трактористарҙы яҙғы сәсеүҙе тиҙ һәм юғары сифатлы итеп үткәреүгә тупламайҙар, агитацион-массовый эштәр бик йомшаҡ алып барыла.

Ҡырмыҫҡалы районының артабан да сәсеү һәм ер һөрөү эштәрендә артта ҡалыуы түҙеп торғоһоҙ хәл. Быны Ҡырмыҫҡалы районының бөтә колхозсылары һәм механизаторҙары аңларға һәм сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн бөтә көстәрен биреп эшләргә тейештәр.

З. Хисмәтуллин.

☆ ☆ ☆

Мәсәғүт совхозы сәсеүҙе һуҙа

Мәсәғүт бөртөклө ашлыҡ совхозы эшселәре социалистик ярышҡа ҡушылып, ағымдағы йылда бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 100-әр бот урожай алырға һүҙ биргәйнеләр.

Ләкин алған йөкләмәне үтәү өсөн бында ысын көрәш юҡ. Сәсеү графиге биш көндән биш көнгә үтәлмәй килә. Бер айға яҡын ваҡыт эсендә тиҫтәләгән трактор менән ни бары 2 мең гектар ер һөрөлдө һәм 400 гектар ашлыҡ сәселде.

Беренсе һәм икенсе бүлексәләрҙә (управляющийҙары Әхмәтсафин, Хатипов иптәштәр) 600—700 гектар майҙанда һөрөлгән ер бар. Был участкала ашлыҡ сәсеү өсөн орлоҡ ебәрәһе урынға, совхоз етәкселәре «хәҙергә сәсмәй торорға, һис кисекмәҫтән һөрөү һәм культивациялауҙың темпын күтәрергә» тигән күрһәтмәләр бирәләр. Был бүлексәләргә 200 тоннанан артыҡ орлоҡто Әй йылғаһы аръяғы ташыйһы бар. Йылғаға әле булһа күпер һалынмаған. Совхоз директоры иптәш Михайлов һыу ҡайтыуын, орлоҡто автомашиналар менән ташырға мөмкинлек тыуыуын көтә. Ә ер киҫә, сәсеү һуңлай.

Совхоз етәкселәре хеҙмәтте ойоштороу, трактористарға эш шарттары тыуҙырыу тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр. Смена заданиеларен үтәүсе һәм арттырып үтәүселәр бик аҙ. Трактор бригадаларында вагончиктәр һәм дәйөм туҡланыу булдырылмағанлыҡтан, трактористәр өйҙәренә ҡайтып йөрөп, бик күп ваҡытты юғалталар.

Алдынғыларҙың тәжрибәләре башҡаларға күсерелмәй. Тракторисҭарҙан Әхтәров, Максимов һәм Швецов иптәштәр сменаға 12—16-шар гектар ер һөрәләр, йөҙәрләгән килограмм яғыулыҡҡа экономия яһайҙар. Алдынғы механизаторҙарҙың был өлгөлө эштәрен совхоз дирекцияһы, беренсе нәүбәттә партия ойошмаһы секретаре иптәш Ожигов күтәреп алырға, уларҙың эш тәжрибәләрен башҡаларға күсерергә тейештәр ине. Ләкин улар смена нормаһын үтәмәүселәр тураһында ҡыҙыҡһынмаған кеүек үк, күрәһең, алдынғылар тураһында ла белергә лә, ишетергә лә теләмәйҙәр.

Н. Ғәлимов.

Бозаязда сәсеү планын үтәү өсөн яуаплылыҡ юҡ

Бозаяз районында яҙғы сәсеү башланғандан бирле теге йәки был сәбәп менән туҡталып тормайынса, бөтә сменаларҙа ла тулы нагрузка менән эшләгән трактор юҡ тип әйтерлек. Ике МТС-та ла бер үк хәл: тракторҙар, техник етешһеҙлектәр һәм ойоштороу-етәкселек эшенең сиктән тыш насар булыуы арҡаһында, бураҙнала туҡталып тороп, ҡиммәтле ваҡытты бушҡа уҙғаралар.

Мәсьәләне асыҡлау өсөн районда алдынғы булып иҫәпләнгән Ишле МТС-ы трактор бригадаларының эшенә күҙ һалырға кәрәк. МТС усадьбаһында иртәнге хеҙмәт көнө «биш минутҡа ғына ҡайҙалыр киткән» механикте һәм әле ауылдан килеп етмәгән токарҙе эҙләүҙән башлана.

— Нимә эшләргә инде, иптәш директор, тракторҙың рәте юҡ бит, — ти «Степановка» колхозынан килгән трактор бригадаһының бригадиры Мадьяров. — Скорость хоробкаһын да алыштырҙым, блок головкаһын да ҡараштырҙым. Юҡ, ҡуҙғалмай минең «НАТИ»...

Директор Хәликов ҡулдарын йәйеп ебәрә:

— Һуң нимә эшләтәһең инде уны! Мин машина телен белмәйем, мин — агрономлыҡҡа ғына уҡыған кеше.

Улар ҡаңғылап аптырашып ултырғанда «Ҡыҙыл маяҡ» колхозында эшләүсе трактор бригадаһының бригадиры Әлибаев ҡулына геткаланып бөткән ҡайыш тотоп килеп инә.

— Нимә эшләргә инде, егеттәр? Вентилятор ҡайышы өҙөлөп сыҡты ла баһа. Ялғап-ялғап та ҡарайым. Бары бер түҙмәй.

Был бригадирға Хәликов та, шунда ултырған өлкән агроном Мәхмүтов та тупаҫ ҡына итеп бер үк һүҙҙе әйтәләр:

— Запас ҡайыштар юҡ. Теләһәң ер аҫтынан эҙләп тап!

Был күңелһеҙ хәлдән сығыу өсөн практик рәүештә нимә эшләргә кәрәклеген саҡыртып килтерелгән механик тә әйтә алмай. МТМ мөдире Рәхимов та, тракторҙарҙың етерлек тиклем яҡшы сифатлы итеп ремонтланмаған булыуҙарын яҫҡа төшөрөү менән генә сикләнә. Былар бөтәһе лә шуны ғына күрһәтә: машиналарҙың «ваҡ-төйәк» ватылыуҙары, ҡайһы бер частәрҙе эш процесында алыштырырға кәрәк буласағы алдан уҡ күҙҙә тотолмаған. Тағы ла насарырағы шунда — трактор бригадаларына урындарҙа техник ярҙам күрһәтеү сәсеүгә сыҡҡанса ла планлаштырылмаған һәм хәҙер ҙә бынан иғтибар бирелмәй. Район һәм өлкә ойошмалары алдында аҡланыу өсөн генә, тип әйтергә кәрәк, күсмә мастерской вагончиге МТС усадьбаһынан 12 километрҙағы бер ауылға илтеп ташланған да, шул рәүешсә, директор Хәликовтың үҙ һүҙҙәре менән әйткәндә, яҙғы эштәр планының «күсмә мастерской ойоштороу тураһындағы пункты үтәлгән».

Бына шунан һуң тракторҙарҙың баҫыуҙа нисек эшләүҙәрен күҙ алдына килтерергә мөмкин инде. Нагаев бригадаһы уҙған йылдарҙа МТС-та ғына түгел, район күләмендә лә бөтә эштә беренсе һәм икенсе урындарҙы алып килә ине. Быйыл иһә, уның тракторҙары күберәк ваҡытты бушҡа үткәрәләр.

— Скорость коробкаһын һүтеп, төҙәтеп МТМ-ға барып йөрөгәндә генә ике көн ваҡытымды үткәрҙем, — ти Нагаев.

Ә МТС-тың өлкән механиге Юнусов, участка механиктәре уттай ҡыҙыу эш осоронда нимә менән шөғөлләнәләр? Юғарыла күрһәтелгәнсә, уларҙы МТС-та ла, колхоз баҫыуҙарында ла осратып булмай. Механиктәр ҙә, МТС директоры үҙе лә бригадаларҙағы ысын хәлде ватыҡ частәр алып килгән трактористарҙың һөйләүҙәренән генә белеп торалар. Ләкин МТС директоры Хәликов өсөн ҡайһы тракторҙың ҡайҙа һәм нисек ватылып ятыуы бары бер. Уның икенсе ҡайғыһы бар:

— Яғыулыҡ етешмәй бит әле беҙҙә, — ти.

Был да дөрөҫ. Яғыулыҡ етешмәүҙең сәбәптәре Хәликов әйткәнсә, ябай ғына, был турала тыныс ҡына һөйләрлек түгел. Һабанға төшкән саҡта ғына МТС-тың яғыулыҡ складында, шул уҡ Хәликовтың ваҡытында тейешле сараларҙы күрмәүе һөҙөмтәһендә, 30 тонна керәсин бактан ағып юҡҡа сыҡҡайны. Шунан бирле Стәрлетамаҡ һәм Ҡарламандан етерлек тиклем керәсин ташыу мәсьәләһе юлға һалынғаны юҡ, Хәликов аҙнаһына бер тапҡыр Стәрлетамаҡҡа ла, Ҡарламан станцияһына ла барып ҡайта. Ләкин үҙенең тесроллеген аҡланырлыҡ итеп эште ойоштора алмай: ваҡытында керәсин килтерелеп еткерелмәүҙән генә бушҡа уҙғарылған көндәрҙең иҫәбен-хисабын ул үҙе лә онотҡан.

Трактор паркының эшендә тағы ла бер ғәфү ителмәҫлек етешһеҙлек бар. Был — тағылма инвентарҙарҙы дөрөҫ файҙаланмау һәм предплужниктарҙы һанға һуҡмау. Ошо ваҡытҡа тиклем бер генә бригадала ла предплужниклы һабан менән ер һөрөү практикаға индерелмәгән. Һабан етешмәгәнлектән, булғандарын ваҡытында ремонтламағанлыҡтан, тракторҙарҙың бер өлөшө бары тик тырматыу һәм ашлыҡ сәсеү эшендә генә файҙаланыла. Ғәбәев бригадаһының тракторҙары 2—3 корпуслы берәр генә һабан тарталар. Канзафаров бригадаһындағы ике тракторға бер генә һабан бар. Шуның арҡаһында, уның бер тракторы эшләгәндә, икенсеһе туҡталып тора. «Динамо» колхозында эшләүсе Вахитов бригадаһы өсөн тағы ла ғәжәберәк «метод» уйлап тапҡандар. Бында, һабан юҡ, тип тракторға һабан урынына 7 лущильник тағып ебәргәндәр. Яҡ-яҡтарына таш киҫәктәре, ауыр гергәр бәйләнгән лущильниктарҙың күргән кешенең йөрәге әрнемәҫлек түгел: улар ерҙе өҫтән-өҫтән генә йырткылап баралар. Ә ошо рәүешсә эшкәртелгән ергә күтәрсен күҙе кеүек таҙа бойҙай сәселә бит! МТС етәкселәре быға бер ҙә бошонмайҙар.

МТС директоры Хәликовтың эшкә үҙ ҡарашы бар:

— Нисек тә планды өҫтән төшөрәһе ине бит әле.

Яҙғы эштәр планының ни бары 48 процентҡа генә үтәлеүе, биш көнлөк графиктарҙың систематик рәүештә өҙөлөүе быны раҫлаусы факт. Ләкин Бозаяз районы етәкселәре эштә нимдәй ҙә булһа һынылыш яһарға йыйынмайҙар. Бында сәсеү планын үтәү өсөн яуаплылыҡ юҡ.

Ғ. Әхмәтшин.

(Махсус хәбәрсебеҙ).

Промышленность предприятиеләре һәм транспорттың рентабелле эшләүҙәренә өлгәшергә

(ВКП(б)-ның Өфө кала комитете пленумы)

27 майҙа ВКП(б) Өфө кала комитетенең нәүбәттәге пленумы булып үтте. Пленум промышленность предприятиеләре һәм транспорттың рентабелле эшләүҙәре турайында мәсьәлә тикшерҙе. Был турала ВКП(б)-ның кала комитете секретаре иптәш Фокин доклад яһаны.

— Һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллык план буйынса, — тине иптәш Фокин үҙенең докладында, — ғәйәт ҙур производство һәм төҙөлөш эштәре башкарыла. Был планды үтәү өсөн халык хужалығының бөтә тармактарында ла сифат күрһәткестәрен яҡшыртырға, предприятиеләрҙең файҙалы эшләүҙәренә, материаль средстволарҙы айырыуса һаҡлык менән тотоноуға өлгәшергә кәрәк.

Партияның кала конференцияһы үҙенең карарында былай тип яҙғайны: «...Конференция — 1948 йылда ук предприятиеләрҙең государство дотацияһынан башка, рентабелле эшләүҙәренә өлгәшеүҙе, катғы экономия режиме үткәреүҙе, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе, хеҙмәтте һәм производствоны ойоштороуҙың яңы методтарын йылдам үткәреүҙе, хужаһыҙлыкка каршы кискен көрәш алып барыуҙы һәм, шул нигеҙҙә, продукцияның үҙенә төшөү хакын кырка кәметеүгә өлгәшеүҙе партия ойошмаларының һәм хужалык етәкселәренең алдына төп бурыстарҙың береһе итеп куя».

— Кала промышленносе, — тип дауам итә докладсы,—үткән 1947 йылдың беренсе кварталына карағанда продукцияны 16,4 процентка куберәк биреп, быйыл I квартал планын 105,8, ә апрель айы планын 105 процентка үтәне. Каланың күпселек предприятиеләре хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәреү аркаһында планды арттырып үтәүгә өлгәштеләр. Ләкин былдай кайһы бер өлгәшеүҙәр кала партия ойошмаһын тынысландыра алмай. Сөнки, беренсенән, февраль һәм март айҙарына сағыштырғанда кала предприятиеләре апрель айында темпты кәметтеләр һәм, икенсенән, еңел промышленность, аҙык промышленносе, коопинсоюз һәм леспромсоюз предприятиеләре квартал планын үтәп еткермәнеләр, апрель айында тағы ла йомшағырак эшләнеләр. Улар исәбенә витамин заводы, 3-сө тегеү фабрикаһы, Жданов райпромкомбинаты һәм башкалар инәләр.

Предприятиеләрҙең хужалык етәкселәре план үтәлмәүенең сәбәбен, ғәҙәттә, производствоның сырье һәм башка материалдар [illegible] аңлатырға тырышалар. Ләкин улар [illegible]

Хәҙер, промышленность предприятиеләренең алдында государство дотацияһынан башка, рентабелле эшләүгә күсеү [illegible] бурыс булып торған бер вакытта, [illegible] бик характерле. Был заводтың коллективы Май айында социалистик ярыштың инициаторы булды һәм кала предприятиеләре [illegible]. Квартал планын 124,4 процентка, апрель айы планын 120,4 процентка үтәне. Завод продукцияның үҙенә төшөү хакын 14,6 процентка кәметте, [illegible] государство дотацияһынан [illegible]

Докладсы Өфө тимер юл узелы предприятиеләренең һәм һыу транспортының эшенә тукталып, [illegible]

«Кала промышленносе предприятиеләренең һәм транспорттың рентабелле эшләүгә күсеүе [illegible]

Күп кенә предприятиеләрҙә массовой квалификациялы кадрҙар әҙерләү һәм эшселәрҙе торлак, көн-күреш шарттары булдырыу эшенә тейешле иғтибар бирелмәй. [illegible]

Сталинсе биш йыллыкты дүрт

йылда уңышлы үтәү тәүге партия ойошмаларының ролен һәм предприятиелә эштең торошо өсөн яуаплылығын күтәреүҙе талап итә. Был бурысты үтәү өсөн предприятие администрацияһының эшмәкәрлегенә ВКП(б) Уставы менән билдәләнгән контроллек хокуҡын тулы файҙаланырға кәрәк. Контроллек хокуҡы ул, шул ук вакытта партия ойошмаларынан предприятиенең эшенә инеүҙе, экономикаһын өйрәнеүҙе, кадрҙарҙы дөрөҫ урынлаштырыуҙы, оборудованиеларҙы, материалдарҙы тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланыу эшен ойоштороуҙы ла талап итә.

Предприятиеләрҙең эшен яҡшыртыуҙа коммунистарҙы производствола дөрөҫ урынлаштырыу бик ҙур роль уйнай. Ләкин күп кенә предприятиеләрҙә быға тейешле иғтибар бирелмәй.

Тәүге партия ойошмаларының һәм ВКП(б) райкомдарының бурысы партиябыҙ талаптарына, район, кала һәм өлкә конференцияларының карарҙарына яуап бирерлек итеп һис кисекмәҫтән үҙ эштәрен кайтанан короуҙан тора. Ләкин беҙҙең партия ойошмаларыбыҙ был өлкәлә бик әкрен куҙғалалар, промышленность менән бик йомшаҡ етәкселек итәләр.

Доклад буйынса беренсе булып сығыш яһаусы ВКП(б)-ның Киров райкомы секретаре иптәш Капустин промышленностка етәкселек итеүҙә райкомда тупланған эш тәжрибәләрен һөйләне. Райондағы кайһы бер промышленность предприятиеләренең өлгөлө эшләүҙәрен күрһәткәндән һуң, ул ярма һәм витамин заводтарының эшен каты тәнкитләне. Был заводтарҙың партия ойошмалары хужалык эшенең деталдәренә инергә, етешһеҙлектәрҙең сәбәбен асырға тырышмайҙар. Хужалык етәкселәренең эшлекһеҙлек күрһәтеүҙәренә килешеп карайҙар. ВКП(б) райкомы һәм кала комитете тарафынан да был заводтарға вакытында тейешле ярҙам күрһәтелмәй.

— Предприятиеләрҙә яңы техникаға эйә булыу, хужалык иҫәбен үткәреү, рентабелле эшләүгә күсеү кеүек мөһим мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеүгә, — тине үҙенең сығышында ВКП(б) кала комитетенең ойоштороу-инструкторлык бүлеге мөдире иптәш Репин, — тик тәүге партия ойошмаларының, райкомдарҙың көндәлек ярҙам күрһәтеүҙәре аша ғына өлгәшергә мөмкин. Ләкин партияның кайһы бер район комитеттәре хужалык эштәрен партия-политик эштәр менән дөрөҫ яраштырып [illegible]

Мисал өсөн, ВКП(б)-ның Жданов райкомы [illegible] Район бюроһы [illegible] 26 утырыш үткәрҙе. Унда 69 мәсьәлә каралған. Ләкин был араһында район промышленность предприятиеләренең план үтәлеше [illegible]

Унан һуң һүҙ алыусы ВКП(б)-ның Жданов райкомы секретаре Тяпкин, паровоздар ремонтлау заводының партия ойошмаһы секретаре [illegible]

Доклад буйынса фекер алышыуҙа электро техника заводы директоры Алексеенко, ВКП(б) кала комитетенең кадрҙар буйынса секретаре Соловьева, кала комитетенең пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире урынбасары Нафиков, ВКП(б) Өлкә Комитете секретаренең промышленность буйынса урынбасары Мастрюков, партияның Молотов райкомы секретаре Болгарев, цемент-силикат заводы директоры Либерман һәм ВЛКСМ-дың кала комитете секретаре Гончар иптәштәр сығыш яһанылар.

Пленум тикшерелгән мәсьәлә буйынса карар кабул итте.

* * *

Пленум шулай ук ойоштороу мәсьәләләрен караны. Кала комитетенең бюро составы пленум членлары Г. Ш. Вәлиев (ВКП(б)-ның Жданов райкомы секретаре) һәм Д. Н. Гончар (ВЛКСМ-дың кала комитете секретаре) иптәштәр менән тулыландырылды.

Иптәш Козловтың башка эшкә күсеүе айканлы иптәш А. И. Иванов кала комитетенең секретаренең промышленность һәм транспорт буйынса урынбасары итеп раҫланды.

Редакцияға хаттар

Шафран санаторийында ҙур етешһеҙлектәр

Советтәр Союзының төрлө яктарынан Шафран санаторийына ауырыуҙар килә. [illegible] Бында ауырыуҙарҙы карыуға ла насар түгел: якты бүлмә, ашамлыҡ яҡшы...

Ләкин был яғы карашты, гүзәл тәбиғәтле күреп тағы ла үсен китһәң, [illegible] бүлмәгә йәки палатаға барып инеү менән һүрелә башлай. [illegible] Умывальниктар юк. Радио һөйләмәй. Ә үҙәк, өлкә газеталарҙы эҙләп тә таба алмайһың. Библиотека китаптарға бик ярлы. Физкультура, спорт һәм массовый уйындар ойошторолмай. [illegible]

Санаторийҙың администрацияһы [illegible]

Врачтар ҙа ауырыуҙарҙы 5—6 көндә бер генә карайҙар. [illegible]

Был шарттарҙа бик сәламәтләнеү түгел, [illegible]

Санаторийҙың администрацияһы [illegible] Башкорт АССР-ы һаулык һаклау Министрлығы һәм ВКП(б)-ның Әлшәй район комитеты шулай ук, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы исполкомы етәкселәре санаторийға эштә ярҙам итмәйҙәр. Улар күрәһең, «санаторий союз әһәмиятендә» бит тип карай торғандарҙыр.

Шафран санаторийындағы был етешһеҙлектәрҙе ашығыс бөтөрергә кәрәк. Ай һайын 800 кешене дауалауға ышаныс тапшырылған санаторийҙең былай хәлдә булыуын бер төрлө лә аңлап булмай.

Ф. Хәйруллин.

—☆—

Яңы мастерской касан төҙөләр икән?

Әбйәлил машина-трактор станцияһы етәкселәре ремонт эштәренә, мастерскойҙы йыһазландырыуға иғтибар итмәйҙәр. Мастерской ситтәндән эшләнгән бәләкәй генә бер һарайға урынлаштырылған. Күп вакыт тракторҙарға һәм башка машиналарға ремонт эштәре колхоздарҙа үткәрелә.

Яңы МТМ төҙөү мәсьәләһе күптән үк хәл ителгән булһа ла, практик эш юк. Был сара өсөн Башкорт АССР-ы ауыл хужалығы Министерствоһы тарафынан бирелгән средство ла файҙаланылмай ята. Ә МТМ юғарынан алынған күрһәтмәләргә карағанда 1948 йылдың беренсе ноябренә төҙөлөп бөтөргә тейеш.

Был яңы төҙөлөш тураһында район Советы исполкомы һәм ауыл хужалығы бүлеге лә кыҙыкһынмайҙар.

Әбйәлил МТС механизаторҙары: **Н. Мөхәмәтғәлин, М. Мелентьев, И. Бармин.**

Агитаторға ярҙамға

Ауыл хужалығы алдынғылары ниндәй уңыштары өсөн Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланалар

СССР Верховный Советы Президиумы үҙенең 1948 йыл 24 апрелдә сығарған Указында юғары урожай [illegible] наградлау өсөн 1948—1949 йылдарҙа күрһәткестәр кабул итте.

Был күрһәткестәр ниндәй һуң? Ауыл хужалығы алдынғылары ниндәй күләмдә урожай алғандары өсөн Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланалар?

Башкортостандың климатик һәм тупрак шарттарында колхоздарҙың һәм совхоздарҙың бағыусылык бригадаларының бригадирҙары, звено етәкселәре, колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, [illegible] бойҙай һәм арыш бер гектарынан 21 центнер, шәкәр сөгөлдөрө — 370 центнер, көнбағыш — 15 центнер, клевер орлоғо —3,5 центнер, люцерна орлоғо — 3,5 центнер, тимофеевка орлоғо— 4,3 центнер.

Был урожайҙы звеноводтар 20 гектар бойҙай һәм арыш (бергә), 3 гектар шәкәр сөгөлдөрө, 10 гектар көнбағыш, 5 гектар үлән сәсеүлеге майҙанының һәр бер гектарынан алырға бурыслылар.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың баҫыусылык бригадаларының бригадирҙары шул ук күләмдәге урожайҙы 60 гектар бойҙай һәм арыштан (бергә), 10 гектар шәкәр сөгөлдөрөнән, 30 гектар көнбағыштан, 10 гектар клевер йәки тимофеевканан, 15 гектар люцернанан алырға тейештәр.

Колхоздарҙың председателдәре һәм агрономдары, совхоздарҙың бүлексә управляющийҙары, агрономдары, механиктары, трактор бригадалары бригадирҙары һәм трактористары юғарыла күрһәтелгән кимәлдәге урожайҙы ҙурырак майҙандан алырға бурыслылар. Мәҫәлән, бойҙай һәм арыш (бергә) — 150 гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 20 гектар, көнбағыш — 60 гектар, клевер — 20 гектар, люцерна — 30 гектар, тимофеевка— 20 гектар. Әгәр ҙә колхоз бәләкәй булыу сәбәпле уның бойҙай һәм арыш сәсеүлеге 150 гектарға етмәһә, ләкин 40 гектарҙан артһа, һәм колхоз Указда күрһәтелгән күләмдә урожай алһа, ул сағында колхоз председателе, шулай ук Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланыуға тапшырыла.

Машина-трактор станцияларының трактор бригадалары бригадирҙары, трактористары, участка агрономдары һәм участка механиктары МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа үҙҙәре эшкәрткән ерҙәрҙә юғары урожай алыуға өлгәшкәндәре өсөн Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланалар. Бының өсөн трактористарға һәм бригадирҙарға 250 гектар бойҙай һәм арыштың һәр бер гектарынан 19-ар центнер йәки 65 гектар шәкәр сөгөлдөрөнөң һәр бер гектарынан 240 центнер, 1?0 гектар көнбағыш сәсеүлегенең һәр бер гектарынан 14-әр центнер урожай алыу кәрәк. Үлән сәсеүлектәрен эшкәртеүсе трактористар һәм трактор бригадалары бригадирҙары 50 гектар клеверҙән һәр бер гектарынан 3 центнер, 75 гектар люцернаның һәр бер гектарынан 3,2-шәр центнер, 50 гектар тимофеевканың һәр бер гектарынан 3,5-әр центнер орлоҡ урожайы алыуға өлгәшергә тейештәр.

МТС-тарҙың участка агрономдары һәм участка механиктары шундай уҡ күләмдәге урожайҙы 500 гектар бойҙай һәм арыштан, 130 гектар шәкәр сөгөлдөрөнән, 200 гектар көнбағыштан, 100 гектар клевер йәки тимофеевканан, 150 гектар люцернанан алалар.

Совхоздарҙың һәм колхоздарҙың юғары урожай алыусы алдынғы работниктарын наградлау өсөн колхозда һәм совхозда түбәндәге шарттар тулыһынса үтәлергә тейеш: колхоздың һәм совхоздың урожай алыу планы тулыһынса үтәлһен, звеноводтарҙы наградлау өсөн звено үҙ сәсеүлегенең калған бөтә майҙанынан, бөтә культураларынан да планда күрһәтелгән күләмдә урожай алһын. Баҫыусылык бригадаһы бригадирҙарын наградлау өсөн наградлау үткәрелә торған культураның калған майҙанынан, бөтә бөртөклө культураларҙан һәм шул Указда күрһәтелгән бөтә культураларҙан да бригада планда күрһәтелгән кимәлдә урожай алһын.

Колхоз мәжбүри иген тапшырыуҙы, контрактацияны, МТС эше өсөн натуралата түләүҙе тулыһынса үтәгән һәм бөтә культураларҙан да киләһе йыл өсөн етерлек һанда үҙен орлоҡ менән тәьмин иткән булырға тейеш. Ә совхоз государствоға ауыл хужалығы продукталары тапшырыу планын үтәгән һәм киләһе йыл өсөн сәсеү орлоғо менән бөтә культураларҙан да етерлек күләмдә үҙен тәьмин иткән булырға тейеш.

Совхоздарҙың трактор бригадаһы бригадирҙарын һәм трактористарын наградлау өсөн, юғары урожай алыу менән бергә, бригада трактор эштәренең планын тулыһынса үтәргә, ә наградлауға тапшырылған трактористарҙың эшкәртеү күрһәткесе бригаданың уртаса күрһәткесенә карағанда 25 процентка юғары булырға тейеш.

Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың айырыуса яҡшы хеҙмәт өлгөһө күрһәткән башка работниктары юғары урожай алыуға өлгәшеүҙә уларҙың катнашлығына карап наградланалар.

МТС-тарҙың директорҙары, өлкән һәм участка агрономдары, өлкән һәм участка механиктары, трактор бригадаларының бригадирҙары һәм трактористары наградлау өсөн түбәндәге шарттар кәрәк: МТС хеҙмәтләндергән бөтә колхоздарҙа ла наградлау үткәрелә торған культураның калған майҙанынан, бөтә бөртөклө культураларҙан һәм Указда күрһәтелгән башка төрлө культураларҙан планда күрһәтелгән урожайҙы йыйып алыу талап ителә. Колхоздар баҫыусылык продукталарының бөтә төрө буйынса ла мәжбүри иген тапшырыуҙы, контрактация һәм МТС эше өсөн натуралата түләү бурысын тулыһынса үтәгән һәм үҙҙәрен етерлек һанда орлоҡ менән тәьмин иткән булырға тейештәр. МТС күләмендә, участка һәм бригада буйынса трактор эштәре планы үтәлгән булыу кәрәк, ә тракторисе наградлау өсөн, бынан башка ул бригаданың уртаса эшләп сығарыуына карағанда 25 процентка күберәк ер эшкәртергә бурыслы.

МТС-тың айырыуса юғары хеҙмәт өлгөһө күрһәтеүсе башка работниктары юғары урожай алыуҙа уларҙың катнашыуҙарына карап наградланалар.

МТС һәм совхоз комбайнерҙарын наградлау өсөн түбәндәге күрһәткестәр кәрәк: 25 эш көнендә «Коммунар» һәм С—4 маркалы үҙе йөрөй торған комбайндар менән 5 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 500 центнер майлы культура һуғып алыу йәки «Сталинец—1» һәм «Сталинец—6» комбайндар менән 6,4 мең центнер бөртөклө ашлыҡ һәм 600 центнер майлы культура һуғып алыу талап ителә. Комбайн менән урыу яҡшы сифатлы ител, юғалтыуһыҙ үткәрелергә, комбайн яҡшы төҙөк хәлдә булырға тейеш. Бынан башка комбайнер ярҙамсыһы ярҙамсы тракторист булып эшләп трактор эштәренең сезон нормаһының 20 процентен үтәргә һәм эшкәрткән ерҙә Указда күрһәтелгән культуралар буйынса планда күрһәтелгән кимәлдә урожай алырға тейеш.

Комбайн агрегатында эшләгән башка работниктар, юғары урожай өсөн көрәштә катнашыуҙарына карап, Хеҙмәт Кыҙыл Байрак ордене менән наградланалар.

Юғары урожай өсөн көрәштә был күрһәткестәргә өлгәшеү социалистик ауыл хужалығының һәр бер намыҫлы работнигенең бурысы булып тора.

З. Вахитов.

БАШКОРТ ТЕЛЕНДӘ БӨЙӨК ЮЛБАШСЫЛАРҘЫҢ ӘҪӘРҘӘРЕ

Марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәрен башкорт теленә тәржемә итеү эше күптән үк алып барыла. В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең төп әҫәрҙәре берәр кат баҫылып сыктылар инде. «ВКП(б) тарихенең кыҫкаса курсы»ның икенсе баҫмаһы, «Советтәр Союзының Бөйөк Ватан һуғышы»ның бишенсе баҫмаһы сығарылды. И. В. Сталиндең «СССР Конституцияһы проекты тураһында доклады», һайлаусылар алдында һөйләгән телмәрҙәре бер нисә тапкыр баҫылып сыктылар. 1947 йылда «И. В. Сталиндең кыҫкаса биографияһы» массовый тираж менән баҫып сығарылды.

Марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен башкорт телендә баҫып сығарыу башкорт халкының культура үҫешендә, һис шикһеҙ, ҙур казаныш булып тора. Улар башкорт хеҙмәтсәндәренә марксизм-ленинизмдең төп мәсьәләләрен, партиябыҙҙың тарихен һәм теорияһын үҙ телдәрендә өйрәнергә мөмкинлек бирә.

Ләкин, был эштең бөгөнгө көндәге торошон беҙ канәғәтләнерлек тип әйтә алмайбыҙ. В. И. Лениндең һәм И. В. Сталиндең төп әҫәрҙәре рус графикаһы нигеҙендәге яңы алфавит менән баҫылып сыкҡандары юк әле. Ә элек латин алфавите нигеҙендә баҫылғандары, күптән үк таралып бөткәндәр һәм уларҙы хәҙер табыуы ла кыйын инде.

Тәбиғи, был хәлде төҙәтеү өсөн конкрет саралар күрергә кәрәк ине. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең пропаганда һәм агитация Управлениеһе был хәлде Башгосиздат эшендәге төп етешһеҙлек тип тапты һәм марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәрен башкорт телендә баҫып сығарыуҙы иң кыҫка вакыт эсендә хәл итергә кушты. Бигерәк тә хәҙерге вакытта, партия Үҙәк Комитете кадрҙарға марксистик-ленинсе тәрбиә биреүҙе партия ойошмаларының эшендә беренсе планға куйған саҡта, В. И. Ленин һәм И. В. Сталин әҫәрҙәрен башкорт телендә тиҙерәк баҫып сығарыу айырата ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

Юғарыла әйтеп үтелгән етешһеҙлекте бөтөрөү маҡсаты менән, Башкортостан Государство Издательствоһы 1948 йылда марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен сығарыуҙы 148 табаҡ күләмендә (17 китап) планлаштырҙы. Был һуғыштан элекке булған өс йылдың планынан күберәк.

Быйыл В. И. Лениндең 2 томлыҡ һайланма әҫәрҙәренең беренсе томы беренсе тапкыр баҫып сығарылырға тейеш. Унан ары В. И. Лениндең «Ни эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Империализм капитализмдең юғары стадияһы», «Государство һәм революция», «Коммунизмда балаларса «һуллыҡ» ауырыуы», «Совет власеның нәүбәттәге бурыстары», И. В. Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистәренең тактикаһы» тигән әҫәрҙәре сығарылырға тейеш. Быйыл, шулай уҡ «Коммунистәр партияһы манифесе» һәм «И. В. Сталиндең кыҫкаса биографияһы» баҫылып сығасаҡ. Шуның менән бергә быйыл 1949 йылда баҫып сығарыу өсөн «Ленинизм мәсьәләләре» әҙерләнергә һәм В. И. Лениндең һайланма әҫәрҙәренең 2-се томы тәржемә ителә башланырға тейеш.

Шулай итеп, марксизм-ленинизм әҫәрҙәрен сығарыуҙа Башгосиздат быйыл бик ҙур һәм яуаплы эш башкарырға тейеш.

Ләкин типографияла йыйыу һәм баҫыу эштәре ғәфү ителмәҫлек әкрен бара. 1948 йыл планына ингән әҫәрҙәрҙе тәржемә итеү һәм редактировать итеү хәҙерге көндә тамамланыу алдында тора. В. И. Лениндең һайланма әҫәрҙәренең беренсе томы тәржемә ителеп һәм редактировать ителеп бөттө. Бары 18 табаҡ материал тәржемә итергә калған, ул июнь—июль айҙарында тәржемә ителеп, наборға биреләсәк.

Хәҙерге көндә бары 4 китап баҫылып сыкты. Улар — И. В. Сталиндең «Ауылда эшләү тураһында», комбайнерҙарҙың беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә, стахановсыларҙың беренсе Бөтә Союз кәңәшмәһендә һөйләгән телмәрҙәре, Партияның XVIII съезында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең эше тураһында отчет доклады, тигән брошюралар. Тимәк, «Октябрь натискаһы» типографияһы йылдың калған 7 айында 140 баҫма табаҡты — пландың 90% самаһын — йыйып, баҫып бирергә тейеш. Әгәр уның эше хәҙерге темп менән бара торған булһа, марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен сығарыу планы үтәлмәй калыуы мөмкин. Эштең бөгөнгө торошона карап хөкөм йөрөткәндә, был бик реаль куркыныс булып тора. Пландың яртыһы самаһын алып торған 60 табаҡлы 1 томды типография әле баҫа башлағаны юк.

Типография етәкселәре объектив кыйынлыктарға — шрифт етешмәүгә, ашығыс заказдар булыуға һылтаналар. Ләкин эш унда тормай. Эш шунда — типография етәкселәре лә, полиграфуправление лә был эшкә шул вакытка тиклем тейешле иғтибарҙы бирмәй килделәр. Мәҫәлән, И. В. Сталиндең 1945 йыл аҙағында уҡ типографияға тапшырылған «Ленин һәм ленинизм тураһында», В. И. Лениндең «Маркс һәм марксизм тураһында» тигән әҫәрҙәре бары тик 1948 йылдың башында ғына баҫылып сыктылар.

Тимәк, марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен сығарыуҙы тиҙләтеү өсөн, бөтәһенән элек, типография работниктарының был эшкә мөһим бер политик заказ итеп карауҙары кәрәк. Типография марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен йыйыу эштәрен тиҙләтергә, был эшкә үҙенең иң яҡшы работниктарын кушырға һәм шуның менән был почетлы һәм яуаплы заданиене намыҫ менән үтәргә тейеш.

Марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен тәржемә итеү бик мөһим политик һәм ижади эш булып тора. Башкорт хеҙмәтсәндәре культураһының үҫеүе, башкорт әҙәби теленең үҫеүе тәржемәселәрҙән һәм редакторҙарҙан бик ныҡ ижади эш талап итә.

Марксизм-ленинизм классиктәренең һәр бер әҫәренең башкорт телендә баҫылып сығыуы республикабыҙҙың культура тормошонда ҙур ваҡиға булып тора.

Тап бына шуның өсөн дә, был китаптарҙы меңдәрсә кешеләр көтөп торғанға күрә лә, марксизм-ленинизм классиктәре әҫәрҙәрен баҫып сығарыу эшен ашыҡтырырға тейешбеҙ.

Ә. Йомағужин.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советендә

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа пар һөрөү барышы тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы Башҡортостан шарттарында иртә һөрөлгән һәм яҡшы эшкәртелгән пар ужым культураларының урожайын күтәреүҙә төп сараларҙың береһе булып тора, тип билдәләне. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп кенә район Советы исполкомдары, район ауыл хужалығы бүлектәре, совхоз, МТС һәм колхоз етәкселәре был эште баһаламайҙар. Шуның һөҙөмтәһендә үҙған йыл күп кенә райондарҙа пар һөрөүҙә һуҙлатыуға, эштең сифатын түбәнәйтеүгә юл ҡуйылды.

Мәкәр, Стәрлебаш, Күгәрсен, Йомабужа, Белоҡатай, Салауат һәм Ҡыйғы райондарында пар һөрөү һәм уны эшкәртеү бигерәк тә насар үткәрелде, план үтәлмәне. Быйыл да ҡайһы бер райондар һәм колхоздар үҙған йылғы хаталарҙы ҡабатлайҙар. Сәсеү менән пар һөрөү араһында өҙәклек тыуҙыралар, пар һөрөүҙе иң һуңғы сроктарға ҡалдыралар. Мәҫәлән, Бөрө районының «Октябрь» колхозында, «Шәмпәк» совхозында һәм Ҡандра, Благовар, Стәрлетамаҡ райондарының күп кенә колхоздарында иртә культуралар сәсеү күптән үк тамамланыуға ҡарамаҫтан, пар һөрөүгә әле булһа башламағандар.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы БАССР Ауыл хужалығы Министры иптәш Денисовты, совхоз тресттарының директорҙары Кузнецов, Фаломеев иптәштәрҙе һәм шулай уҡ район Советы исполкомы председателдәрен, МТС, совхоз һәм колхоз етәкселәрен 10 июндән дә һуңға ҡалмай пар һөрөү планын үтәүҙе тәьмин итергә мәжбүр итте. Уларға ҡыҫҡа срок эсендә пар һөрөү буйынса биш көнлөк һәм ун көнлөк заданиелар билдәләргә һәм ул заданиеларҙы һәр көндә һәр бер совхозға, колхозға һәм трактор бригадаһына еткерергә ҡушылды.

Район, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәре билдәләнгән заданиеләрҙе үтәү өсөн һис кисекмәҫтән тейешле һанда тракторҙар һәм тартыу көстәре бүлергә тейештәр. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдирҙәре һәм баш агрономдары, МТС, совхоз директорҙары һәм өлкән агрономдары пар һөрөүҙең агротехникаһына ныҡлы иғтибар бирергә, пар баҫыуын сәсеү әйләнешенә ярашлы итеп урынлаштырыуҙы, һөрөүҙе тырматыу менән бергә үткәреүҙе тәьмин итергә тейештәр. Ерҙе 20 — 22 сантиметр, ә һөрөнтө ҡатлам һай булған участкаларҙа бөтә тәрәнлегендә һөрөргә кәрәк. Һай һәм сей ҡалдырып һөрөүгә юл ҡуйылырға тейеш түгел. МТС һәм совхоздарҙа тракторҙар паркының кәмендә яртыһы предплужникле һабандар менән эшләргә тейештәр.

Пар еренә тирес һәм башҡа урындағы ашламаларҙы индереүгә ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк. Был ерҙәр йәй буйына ҡый үләндәренән таҙа һәм йомшаҡ тотолорға, бының өсөн кәмендә өс тапҡыр культивация үткәрелергә тейеш.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы БАССР ауыл хужалығы Министрлығының, совхоз тресттарының, район Советы исполкомдарының һәм МТС директорҙарының пар һөрөүҙә тракторҙарҙың ике сменала эшләүҙәрен, һәр бер трактористең смена нормаһын үтәүен тәьмин итергә мәжбүр итте. Бер генә тракторҙың да тик тороуына юл ҡуймаҫҡа, трактор бригадаларына үҙ ваҡытында техник ярҙам күрһәтергә, күсмә мастерскойҙарҙың өҙлөкһөҙ эшләүенә өлгәшергә кәрәк.

Пар һөрөүҙә һәм эшкәртеүҙә МТС-тар менән колхоздар араһында төҙөлгән договор тулыһынса үтәлергә, һөрөлгән ер һәр бер сменанан һуң трактор һәм баҫыусылыҡ бригадаһы бригадирҙәре, учетчиктар менән берлектә, ә 5 көнгә бер колхоз председателе һәм МТС-тың участка агрономы тарафынан ҡабул ителергә тейеш.

700 гектар майҙанда пар һөрөлдө

БАҠАЛЫ. (Телефон аша). Сәсеүҙе тамамлаған колхоздар пар һөрөүгә башланылар. Сталин исемендәге колхоз (председателе иптәш Тажетдинов) 27 майға 73 гектар пар һөрҙө. Һабансыларҙан Малик Кәримов, Хәмит Хаков иптәштәр 0,70 гектар урынына, көн һайын 1-әр гектар ер һөрәләр.

Был колхоз сәсеүҙә артта баҫыусы Осипенко исемендәге ауыл хужалығы артеленә ярҙамға 12 ат бүлде.

Карл Маркс исемендәге колхозда ла хәҙер бөтә көс пар һөрөүгә тупланды. 4 көндә 50 гектарҙан артыҡ ер һөрөлдө. Һабансы Рәис Бикмөхәмәтов көндәлек эш нормаһын 140—150 процентҡа үтәй. «Красный пахарь», «Үрнәк», «Яҡты шишмә» колхоздары ла ужым культуралары өсөн 40-ар гектар ер һөрҙеләр.

Райондың колхоздары бөтәһе 700 гектар майҙанда май пары күтәрҙеләр.

Х. Ғәлимов.

Яңы биш йыллыҡ төҙөлөштәрендә

Өфөлә яңы нефть эшкәртеү заводын төҙөү башланды

Өфөлә яңы биш йыллыҡтың ҙур әһәмиәтле төҙөлөштәренән береһе булған яңы нефть эшкәртеү заводының промышленный объекттарын төҙөү эше башланды. «Главнефтестройҙың» иптәш И. М. Башилов етәкселек иткән төҙөүселәр коллективы был көндәрҙә айырыуса ҡыҙыу эшләй. Ул бик ҙур төҙөлештең беренсе промышленный объектын — теплоэлектроцентраль стеналарының нигеҙен һала. Бер үк ваҡытта завод өсөн коммуникациялар төҙөү эше лә алып барыла. Яҡын арала төҙөүселәр ҙур һыу йыйыу станцияһы, промышленный водопроводты һәм сырьё өсөн емкостар паркын төҙөргә башлаясаҡтар.

Үткән кварталда ғына автомашиналар өсөн ҙур гараж, авторемонт мастерскойы, тракторҙар өсөн парк һалынды. Яҡын арала Шакша станцияһында йылына 17 миллион кирбес бирә торған бик ҙур кирбес заводын төҙөү башлана.

Төҙөлештә эшселәр һаны арта. Улар өсөн торлаҡ йорттары һалына. Төҙөлә башлаған заводтың һәм Черниковскиҙың күп кенә урындарында әле ағас һәм быяу есе лә китеп бөтмәгән яңы, бик матур коттедждар осратаһың. Уларҙың һаны хәҙер 100-ҙән артыҡ.

Производство программаһын арттырып үтәү һәм төҙөлештең үҙенә төшөү хаҡын кәметеү өсөн социалистик ярыш барлыҡ эшселәрҙе, управлениеларҙы, участкаларҙы, бригадаларҙы һәм инженер-техник работниктарҙы солғап алды.

Был ярышта 4-се управление (начальнигы иптәш З. М. Пратусевич) алда бара. Управление һәр айҙа планды 110—113 процентҡа үтәй.

Профессиялар буйынса ярышта заводтың атаҡлы ташсыһы Сергей Михайлович Лежнев, дүрт профессияға эйә булған күренекле стахановсы Хәлиулла Әғзамов, балта оҫталары Д. М. Смородин, М. С. Чегодаев, атаҡлы штукатурщица Сироткина иптәштәр айырыуса яҡшы күрһәткестәр бирәләр.

Х. Рафиков.

ЯРТЫ ЙЫЛЛЫҠ ПЛАНДЫ ҮТӘНЕ

Өфө штамплау заводы коллективы май алды социалистик ярышында алынған темпты төшөрмәй, стахановса эшләүендә дауам итә. Коллектив намыҫлы хеҙмәт һөҙөмтәһендә ярты йыллыҡ планды срогынан алда — 23 майға уҡ үтәне. Продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 19 процентҡа кәметелде һәм сифаты күп яҡшыртылды.

Заводта алдынғылыҡты начальнигы иптәш Свешников булған штамплау цехы алып килә. Был цех дүрт айҙа ярты йыллыҡ заданиене үтәне.

Уңған егет

Төн. Ҡараңғылыҡ шаршауы бөтә ер өҫтөн ҡаплаған. Тәбиғәт, төн тынлығына иҙерәп, йоҡоға талған. Баҫыу тынлығында трактор моторҙарының көслө шаулауы ғына алыҫтарға яңғырай.

Ситтән ҡарағанда диңгеҙҙәге елкәнле хәтерләтеп, алға күсеп барған һымаҡ тойолоп торған, аҡ итеп ағартылған трактор вагончигы төн ҡараңғылығында айырылып тора. Уның эсе, уңған ҡыҙҙар ҡулы менән йыйыштырылған шикелле, йыйнаҡ, йылы һәм уңайлы. «Летучая мышь» фонаре трактористарҙың был күсмә «квартираһын» яҡтыртып тора. Стенала лозунг, плакаттар, бригаданың һәм һәр бер трактористең индивидуаль йөкләмәләре, тракторҙар эше планы, күрһәткес таҡтаһы, «боевой листок», стена газетаһы. Техник тәрбиә графигы һәм заправка яһау тәртибе эре хәрефтәр менән яҙып эленгән. Ә «Ҡыҙыл мөйөштә» газета-журнал, художестволы әҙәбиәт китаптары һәм «ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсы». Алтын уҡалар менән биҙәлгән Ҡыҙыл Байраҡ бөтәһенән айырылып күҙгә бәрелеп тора. Ул, яҡшы хеҙмәт күрһәткестәре өсөн, Приют МТС-ының дирекцияһы тарафынан бирелгән.

Трактористар, оҙон көн буйына ныҡышмалы эшләп арыуҙарына ҡарамаҫтан, беҙ ингәс бөтәһе лә бер юлы урындарынан торҙолар һәм асыҡ йөҙ менән һүҙгә ҡушылдылар.

— Бригадир ҡайҙа?—тип һораны МТС-тың өлкән механигы.

Трактористар, үҙ етәкселәре менән ғорурланған шикелле, бер-береһен бүлә-бүлә яуап ҡайтарҙылар:

— Бригадир? Ҡайҙа булһын ул, баҫыуҙа, тракторҙар янында.

— Уңған һәм тырыш кеше ул, беҙҙең бригадир.

— Тынғыһыҙ. Үҙе лә йоҡламай, башҡаларға ла тынғы бирмәй.

— Һәм бик дөрөҫ эшләй. Яҙғы көн — йылды туйҙыра, тиҙәр бит. Ваҡыттың сәғәте генә түгел, минуты ла ҡиммәт хәҙер.

* * *

Тракторҙарҙың уттары күҙҙе сағылдырып балҡый һәм уның яҡтылығында тигеҙ булып ятҡан ҡаҫтарҙың өҫтө ялтырап күренә. Көслө «НАТИ»-ҙе тракторист Зиннур Миннуллин йөрөтә. Ә икенсе участкала «СТЗ» тракторы менән Нурислам Мифтахов һөрә. Әминев Хөрмәт культивациялай.

Хөрмәт Ғөбәйҙуллин — комсомолец-йәштәр трактор бригадаһының бригадиры—машинанан-машинаға күсә, яҡты йөҙ, йылы һүҙ һәм аҡыллы кәңәш менән үҙенең хеҙмәттәштәрен дәртләндерә. Тәжрибәле, һиҙгер бригадир бәләкәй генә кәмселекте лә, мотор «йырлауындағы» аҙ ғына фальшты ла күрә, ишетә һәм шунда уҡ уны төҙәтеп ебәрә.

— Туҡтат! — Бригадирҙың тауышын ишетеп тракторист Зәйнуллин моторҙы һүндерҙе.

— Нәмә бар, Хөрмәт?

— Ишетмәйһеңме ни, моторың тигеҙ эшләмәй. Һиҙгер булырға кәрәк, Зиннур, тракторҙы харап итеүең мөмкин.

Ул тракторҙы тикшерҙе, бик тиҙ төҙәтте: Трактор моторы тағы ла гөрләп һәм эшкә башланы.

Бригадир һабандың айырым алынған принциплеге лә иғтибарҙы ситтә ҡалдырмай. Һөрөү тәрәнлеген уның һәр ваҡыт күҙәтеп барыуын, урыны менән һабандың тәрәнлеген һәм ... күҙәтеп итә. Шуға күрә лә ҡаҫтар тип-тигеҙ булып ятала. Һөрөү тәрәнлеге 20 сантиметрҙан да кәм түгел.

Ер өҫтө алһыу нурға күмелгән, таң беләнде. Күп тә үтмәй, «боевой листоктың» яңы номеры сығарылды. Унда:

— Миннуллин Зиннур төнгө сменала 5,8 гектар сиҙәм һөрөү планын 12 гектарға еткереп үтәне. Мифтахов Нурислам 3 гектар урынына 4,5 гектар ер һөрҙө. Хөрмәт Әминев та уларҙан ҡалышмай. Алдынғыларҙан үрнәк алығыҙ!—тип яҙылғайны.

* * *

— Уңышың менән ҡотлайым, — Хөрмәт!—Молодец!—Бына механик дуҫтарса, ихлас күңелдән данлы бригадирҙың ҡулын ҡыҫты.

— Рәхмәт! Ҡулдан килгәнсә тырышабыҙ, иптәш механик.

— Әйт әле, беҙҙең уңыштарҙың сере нәмәлә һуң Хөрмәт? Башҡа бригадалар ни өсөн һеҙҙән ҡалыша?...

— Машинаны биш бармағың кеүек белергә, уны һөйөргә һәм ... эшләргә кәрәк. Башҡаса «сер» юҡ.

Хөрмәт Ғөбәйҙуллин, комсомолец ... бригадаһына тейешле бер нәмә тереп, уйға ҡалды. Шунда уҡ, ул тағы ла һүҙен дауам итте.

— Беҙҙә тик тороуҙар булмай. Тракторҙар тәүлеккә 20 — 22 сәғәт бураҙнала булалар. Заправка ер өҫтөндә үткәрелә. Төшкө аш ваҡытында ла трактор туҡтатылмай. Трактористар алмашлап ашайҙар. Шул арҡала эш өҙлөкһөҙ дауам итә.

Беҙ техник тәрбиә яһауға ғына ваҡытты йоғалтмайбыҙ. Был ваҡыт буразнала өҙлөкһөҙ эшләү менән кире ҡайтарыла. Техник тәрбиә сменалар алмашынған арала үткәрелә. Ошо ваҡытта тағылма инвентарь ҙа ҡарап сығыла. Шулай итеп, беҙ бик күп ваҡытты «отабыҙ». Уңыштарҙың сәбәбе, бәлки шундалыр.

* * *

Трактор бригадаһы бригадиры Хөрмәт Ғөбәйҙуллин Йормәкәй районында ғына түгел, бөтә Башҡортостанға билдәле. Яңы торған үткер күҙле, етеҙ йөрәкле был егет 1938 йылда, 17 йәшендә беренсе тапҡыр тракторға ултырҙы. Бына ун йыл инде, ул бөтә йәшлек көсөн, йөрәк ялҡынын биреп социалистик ауыл хужалығының баҫыу киңлектәрендә юғары урожай өсөн көрәшә. Уның тураһында:

— Тракторҙа сыныҡҡан үҫкән егет, — тиҙәр. Был һүҙҙәр уңған егеткә һәм уның маҡтаулы хеҙмәтенә ихтирам менән әйтелә.

Тыуған йылда уҡ Хөрмәт Ғөбәйҙуллин Приют МТС-ының алдынғы механизаторы булып күтәрелә. Ул үҙ сменаһында «СТЗ» тракторы менән 549 гектар ер эшкәртеп, социалистик ярышта еңеп сыҡты. 1942 йылдан бирле ул комсомолец-йәштәр трактор бригадаһына етәкселек итә. Уның бригадаһы йылдан-йылға МТС-та беренсе урынды алып килә.

Үткән, 1947 йылда иптәш Ғөбәйҙуллин бригадаһы айырыуса ҙур уңышҡа өлгәште. Шартлы һөрөү буйынса бригада 1394 гектар ер эшкәртеп, ул республика күләмендә иң алдынғы трактор бригадалары сафына баҫты.

Хөрмәт Ғөбәйҙуллин бригадаһының члендары Ленин комсомолында тәрбиәләнеп, коммунистар партияһы сафына инеп килеләр. Коммунист өсөн һәр яҡлап алға, айырыуса ынтылыу характерле сифат. Ул бер урында тороуҙы, өлгәшелгәндәр менән тынысланыуҙы белмәй. Ғөбәйҙуллин бригадаһы быйылғы йылға ла ҙур һәм ҙурыраҡ йөкләмәләр алды. Большевиктар партияһының һәм Совет Хөкүмәтенең бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталинға яҙылған хатта:

«Приют МТС-ының иптәш Ғөбәйҙуллин етәкселек иткән трактор бригадаһы һәр бер тракторға 1500 гектар ер эшкәртергә йөкләмә алды» тип әйтелгән.

— Бөйөк юлбашсыбыҙ һәм кеүҙә атайыбыҙға биргән вәғәҙәбеҙҙе үтәү өсөн йәнебеҙҙе лә, тәнебеҙҙе лә аямайынса эшләрбеҙ, — тине иптәш Ғөбәйҙуллин.

Был һүҙҙәргә ышанырға мөмкин. Коммунист Хөрмәт Ғөбәйҙуллин һүҙен елгә ташлап торған егет түгел. Уның бригадаһы быйыл ҙа баҫыу эштәре планын арттырып үтәне лә инде. Хәҙер ул 1 мең 96 гектар ер эшкәртте. Был—шартлы һәр бер тракторға 373 гектар, тигән һүҙ.

Яр. Вәлиев.

Ә. Бикчәнтәй

Әлфиә

(Новелла)

Әлфиә бынан бер ай элек завод цехында эшләй башланы. Шул ваҡыттан алып токарҙар сменанан һуң ҡала башланылар, ә төшкө аш ваҡытында илле ике ҙур станоктан быяла менән генә бүленеп алынған кескәй генә конторағa инделәр. Йәш токарҙар, оҙон керпекле, ҡаты күңелле ҡыҙҙың иғтибарын үҙҙәренә йәләп иттерер өсөн төрлө-төрлө, ваҡыты менән көлкө булған, сәбәптәр табып, уның янында йөрәштерҙеләр. Улар йә үҙҙәренең эшләгән нормалары менән ҡыҙыҡһынған булдылар, йәки нарядтарҙы ҡаранылар. Һис то булмаһа ҡыҙ кешегә бер ике ҡыҙыҡлы һүҙ әйтеү нейәте менән конторағa күҙ һалып сыҡтылар.

Илдар иң баштан уҡ ҡыҙҙы алыҡтырмаҫҡа уйланы. Ул иптәштәре араһында үҙен күрһәтеү нейәте менән дә түгел, ә Әлфиә менән ҡыҙыҡһынмағаны тураһында үҙен үҙе ышандырырға теләне. Унан һуң Илдар һәр ваҡыт Әлфиәнең матур күҙҙәренә ҡарарға ҡурыҡты. Ә бит кешелә иң матур — күҙ һәм уны йөрәктең көҙгөһө тиҙәр.

Беренсе көндәрҙә конторщица менән үҙ кешеләрсә һөйләшкән егеттәр ҙә һуңғы ваҡыттарҙа бик һаҡ була башланылар: артыҡ шаяртыуҙар булманы, кәрәкмәгән һүҙҙәр һөйләнмәнеләр, сөнки ҡыҙға ундай һүҙҙәрҙең береһе лә оҡшамай ине. Шулай ҙа, ял минуттарында, цех начальнигы конторала булмаған саҡында, тәүәккәлерәк егеттәр Әлфиә янына инделәр һәм кино, хеҙмәт хаҡы, спорт тураһында булһа ла һүҙ башларға тырыштылар. Улар Әлфиәнең саңғыла йөрөргә яратыуын беләләр ине. Ә егеттәр иһә үҙҙәрен күп ваҡытта ҡаты тоттолар, һиҙҙермәйенсә генә күҙ ҡыҫышып алдылар, тәмәке төпсөктәрен кеҫәләренә һалдылар, сөнки өҫтәл өҫтөндә пепельница юҡ ине.

Цех начальнигы Әлфиәне үҙе юҡ сағында ла бик маҡтаны.

— Ҙур эштең бәләкәй хужаһы, — ти ул. Уға һәр ваҡытта бер төрлө өндәшә:

— Әлфиә Һадиевна!

Башта шундай бәләкәй ҡыҙҙы улай тип әйтеү бик сәйер тойолдо, һуңынан барына ла күнектеләр һәм көлмәй башланылар. Тик егеттәр генә Әлфиәне русса «Аля, Фая» тип йөрөтөргә рөхсәт һоранылар, ләкин ул һәр ваҡыт көлөп яуап бирҙе:

— Әл... фиә — тип әйтеүе ауырмы әллә? — Егеттәр быға риза булдылар, әлбиттә, ҡыйын түгел, тинеләр.

Илдар, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, цехта уртаса кеше ине. Нормаһын тултырыуҙан алыҫ китмәне. Үҙенең эшен башҡара алыуы менән риза булды. Заводҡа ваҡытында килде, цехтан ваҡытында китте, йыйылыштарҙа, стена газеталарында ла уны маҡтаманылар ҙа, тиргәмәнеләр ҙә. Ләкин ул киноны бик яратты. Ваҡыты менән ул бер кистә бер нисә фильм ҡарарға өлгөрҙө.

Йәш токарь, кескәй буйлы, һөйләшергә яратыусан әсәһе менән йәшәне. Ул бөтә күршеләренә тип әйтерлек Илдарҙың атаһына бик оҡшаш булғанын, улының тәмәке тартмағанын, араҡы эсмәгәнен, боҙолмағанын маҡтай торғайны. Эш хаҡын улы һәр ваҡыт өйгә алып ҡайтты һәм күңел асыу өсөн тип үҙенә бик аҙ ғына алып ҡалды.

Илдарҙа кино артистарының фотокарточкалары бик күп ине, үҙе ҡараған фильмдарҙы лә ул айырым дәфтәргә яҙып барҙы һәм һәр ҡараған фильм исеме янына минус һәм плюстар ҡуйҙы. Илдар Әлфиә менән осрашырға теләмәне, тип әйтеү дөрөҫ түгел. Киреһенсә, ул уның менән киноларҙа, театрҙарҙа осрашаһы килде, бергә фильм ҡарарға, унан һуң уны оҙатырға, уның менән оҙаҡ-оҙаҡ барырға, кино тураһындағы фекерҙәрен тыңларға теләне... Бына кинола ла шундай пар ҡыҙ менән егеттең икәүһен күрһәтәләр, улар урамда, урманда, йәки диңгеҙ ярында йөрөйҙәр...

Һуңғы ваҡытта Илдар мастер, элекке сержант Семен Федорович артынан әллә нисек бик оҙаҡ күҙәтә башланы. Йәш ҡыҙҙың уға иғтибар итә башлағаны һиҙелә ине. Имеш улар сменанан һуң да икеһе бергә цехта ҡалып, һөйләшеп ултыралар икән, ти башланылар.

Был турала күберәк Ғүмәр һөйләне, ләкин Илдар уға бик ышанып етмәне, сөнки ул Ғүмәр ахры көнләшә торғандыр тип уйлай ине. Шулай ҙа бер кисәлә, яңы йылды ҡаршылағанда булһа кәрәк, Әлфиә күберәк цех мастерҙары менән бейене. Күпме һуң күҙәтеүсе булып йөрөргә мөмкин? Илдар, үҙ иптәштәренә ҡарағанда, ҡыҙ менән йышыраҡ һөйләшергә тырышты, көнгә бер нисә тапҡыр конторағa керҙе.

— Һеҙ Нижегородкала тораһығыҙмы?—тип һораны Илдар. Ҡыҙ бер һүҙ ҙә өндәшмәй баш ҡаҡты, һәм счетта иҫәпләп ултырыуында булды,—улай булғанда беҙгә Туҡай урамына тиклем бергә. Проходнойҙа һеҙҙе көтәм. Рөхсәт итәһегеҙме?

Ул иҫәпләп ултырыуынан туҡталып, иғтибар менән Илдарға ҡараны.

— Һеҙ мине оҙатырға теләйһегеҙме? — тип һораны ул йылмайып.

Илдар юғалып ҡалды һәм һүҙҙе уйын-көлкөгә бороп ебәрмәксе булды.

— Мин маршрут менән ҡыҙыҡһынғайным.

— Нигә һуң беҙгә бергә ҡайтмаҫҡа, — тип яуапланы Әлфиә,— мөмкин.

Ул кисте күбәләк ҡар яуа һәм миллион мамыҡсылар мамыҡтарҙы болоттарҙан өҙөп елгә осороп ебәргән шикелле ине. Ҡарҙар яҡаларға йәбеште, танауҙарҙа ирене. Мамыҡ ҡарҙар ергә аҡрын ғына төштөләр... Аҡ күбектән йәйелгән келәм шикелле ҡар өҫтөнән атлауы еңел һәм рәхәт ине.

Башта улар һүҙһеҙ килделәр, һәм һуңынан Әлфиә былай тине:

— Ни өсөн һеҙҙе катокта ла, саңғы менән йөрөгәнегеҙҙе лә күреп булмай?

— Малайҙар менән күберәк кинола булам мин, ә һәр ваҡыт бер үҙем, — тине Илдар.

— Ә мин сигеү эше менән мауығам, — тине Әлфиә яуаплап.— Әсәй өйрәтә. Спорт һәм ғүмер тураһында уҡырға яратам. Тағы — «Һуғыш һәм тыныслыҡ» ты яратам, ә инде Анна Каренинаны аңламайым. Мин бер ваҡытта ла поезд аҫтына ташланмаҫ инем. Мин Люба Шевцова шикелле булырға теләйем. Һеҙ йәш гвардеецтарҙы беләһегеҙме?

— «Комсомолкала» өҙөктәрен генә уҡыным, — тип яуап биреүе егеткә ҡыйын булды. «Мин уны бары бер уҡымаҫаҡмын» тине ул үҙ-үҙенә.

Әлфиәлә әллә ниндәй ҡыҙыҡ тойғолар тыуҙы, уға, ҡапыл унан көләһе килде.

— Һеҙҙең артта ҡалыуығыҙ миңә оҡшамай, — тине ул, — һеҙҙе ғәрләндермәйме?

— Нисек инде? Минең бит 100 проценттан да юғары, — тине токарь.

— Һикһән биш токарь араһында һеҙ алтмыш алтынсы урында тораһығыҙ. Ул турала уйлап ҡарамағығыҙмы ни?

— Мине бер кем дә әрләмәҫ, тип уйлағайным.

Ҡыҙ барған еренән туҡталып ҡалды, бер нисә ҡаршы һүҙ әйтмәксе ине, кире уйланы.

— Мин үҙемде үҙем яҡламайым, — тип дауам итте Илдар. Ҙур һумдар артынан ҡыумайым— эш хаҡы етә. Буш ваҡыт та күп.

— Эш һумдарҙа түгел, — тине ҡыҙ ризаһыҙлыҡ менән, — ә кешенең яҡшылығында, — Әлфиәнең ни өсөн шулай тигәнен Илдар шунда уҡ аңламаны. Шуның өсөн дә:

— Әйҙә башҡа берәр нәмә тураһында һөйләйек, — тип өҫтәп ҡуйҙы. — Һеҙҙең менән мин бер ваҡытта ла дуҫ булмаҫ инем, — тине Әлфиә ҡапыл туҡтап.

— Ни өсөн? — тип һораны Илдар.

— Һеҙ подвигтең матурлығын таный белмәйһегеҙ, — тине Әлфиә, —һин заводтың яҡшы токаре тиһәләр, кеше үҙен ниндәй яҡшы хис итә. Ихтыярлы, көслө рухлы кешеләр генә алғы сафта була алалар.

— Хәҙер барыһы ла аңлашыла,— тине Илдар түҙә алмай, — һеҙ барығыҙ ҙа бер төҫлө, шуныһы аңлашылмай, ни өсөн һуң данлылар өсөн һушығыҙ китә?

Фәҡәт шунан һуң ғына Әлфиә ҡабалап:

— Оҙатмағыҙ, мин бер үҙем генә ҡайтып етермен...

Ошо урында беҙҙең хикәйә лә башлана... Бер нисә көндәр Илдар Әлфиә менән осрашырға теләмәне, ләкин зифа буйлы, оҙон керпекле, ҡаты холоҡло ҡыҙ уның уйынан китмәне. Ул, цехҡа, быяла менән бүленеп алынған конторағa инеп сығыу өсөн иртәнге гудокты түҙемһеҙлек менән көттө.

Семен Федорович Ленинградтан алынған яңы станоктарҙы үҙләштерергә бөтә токарҙарға тигеҙ ҡарап ярҙам күрһәтергә тырышһа ла, Илдар мастерға һалҡын ҡарай башланы.

— Багданов, — тип бер ваҡыт ул иҫкәртеп ҡуйҙы, — һеҙҙең эштәр бик уртаса ғына бара. Көстө ғыраҡ һалырға ваҡыт түгелме?

— Күренекле булыуҙың миңә кәрәге юҡ, данлы булырға теләмәйем, — тип Илдар ҡоро ғына яуап ҡайтарҙы.

Мастер нәмәлер ҡаршы әйтергә теләгәйне, ләкин уны Василий саҡырҙы. «Шайтан алһын әйҙә, — тип асыуланды Илдар, кисә Әлфиә сменанан һуң тағы уның менән ҡалды».

Цехтың үҙенең атаһы — бер ҡулһыҙ Филипп Филиппович бар. Ҡулын ул Польшала ҡалдырҙы. Илдарҙың уның менән күптән һөйләшәһе килгәйне, ләкин уңай ваҡыт таба алманы. Бөгөн инде Филипп Филиппович үҙе Илдар янына килде. Ул йәш токарҙың етеҙ ҡулдары нисек хәрәкәт иткәнен бик оҙаҡ ҡарап торҙо. Һуңынан Илдар станоктан башын күтәргәс:

— Сәләм, егет кеше! — тип иҫәнләште Филипп Филиппович, ҡулын биреп.

— Минең ҡулым бысраҡ, — тине токарь тартынып.

— Беләһеңме, — тип дауам итте Филипп Филиппович, — Ленинград нисә көн блокадала булды? Мең көнгә яҡын. Һуғыштан

(Аҙағы 4-се биттә).

Греция хөкүмәтенең яуабы ҡәнәғәтләнерлек түгел тип танылды

13 майҙа Советтәр Союзының Афиналағы Посольствоһы Грецияла демократтарҙы үлтереүгә ҡарата Совет Хөкүмәтенең белдереүен Греция Хөкүмәтенә тапшырғайны. Был белдереүҙә, грек демократтарын массовый рәүештә үлтереүҙәр совет халыҡтарында асыу тыуҙырҙы, был үлтереүҙәр цивилизациялы донъя алдында бер нисек тә аҡлана алмайҙар, һәм совет общественносе халыҡтарҙың выжданында нәфрәт тыуҙырыусы был үлтереүҙәрҙең, һис киҫекмәҫтән, туҡтатылыуын көтә, тип әйтелә.

Советтәр Союзының Афиналағы Посольствоһы ошо көндәрҙә был белдереүгә Греция Хөкүмәтенең яуабын алды. Греция Хөкүмәте, үҙ хәрәкәттәрен аҡларға маташып, үҙенең яуабында, имеш, совет общественносе Грециялағы ысын хәл тураһында етерлек белмәй, тип һәм бөтә кешегә билдәле булған фактыларға ҡапма-ҡаршы рәүештә, «Грецияла бер генә кеше лә үҙенең политик фекере өсөн үлтерелмәнс», тип күрһәтә. «Ғәйәт эштәр өсөн яза биреү һәр бер государствоның үҙ компетенцияһы булып тора», тип һылтанып, Греция Хөкүмәте грек демократтарына ҡаршы греция власттәре тарафынан ҡулланыла торған рәхимһеҙ сараларҙы аҡлай.

Греция Хөкүмәтенең ошо яуабы айҡанлы СССР-ҙың Афиналағы Посольствоһы Греция сит ил эштәре Министерствоһына нота ебәрҙе. Греция демократтарын үлтереүҙәр тураһында Совет Хөкүмәтенең белдереүгәнә яуап булып тороусы һәм Греция Хөкүмәтенең ошо күрһәтелгән хәрәкәттәрен аҡлаусы Греция Хөкүмәтенең нотаһына таянып, Совет Посольствоһы, Греция Хөкүмәтенең ошо күрһәтелгән яуабын ҡәнәғәтләнерлек тип тапмағанлығын белдерә һәм үҙенең 13 майҙа яһаған белдереүендә яҙылған позицияһын раҫлай.

(ТАСС).

АНГЛИЯЛА «КОММУНИСТИК ЭШМӘКӘРЛЕКТӘ» ШИКЛЕ БУЛҒАН КЕШЕЛӘРҘЕҢ ЭШТӘН АЛЫНЫУЫ

ЛОНДОН, 26 май. (ТАСС). «Дейли телеграф энд Морнинг пост» газетаһының хәбәрсеһе, государство аппараты хеҙмәткәрҙәрен әҙерләү буйынса институттың 12-гә яҡын сотрудниге, башлыса, ғалимдар, государство имиңселегә менән бәйләнешле мөһим йәшерен эш менән шөғелләнеүсе кешеләр булғандары өсөн эштәренән алындылар, тип хәбәр итә. Был кешеләр «коммунистик эшмәкәрлектә» ғәйепләнәләр. Уларҙың эштәре государство учреждениеларенең шикле хеҙмәткәрҙәренә ҡарата рекомендациялар биреү өсөн төҙөлгән хөкүмәт консультатив комиссияһына тапшырыласаҡ.

Израиль государствоһы президентенең белдереүе

ВАШИНГТОН, 26 май. (ТАСС). Израиль государствоһы президенте Вейцман, пресс-конференцияла сығыш яһап, үҙенең Трумэн менән булған 30 минутлыҡ кәңәшмәһе ваҡытында Палестинаға ҡорал сығарыуға булған Эмбарголың (тыйыу) бөтөрөлөүе һәм Израиль государствоһына Америка ҡоралын биреү мөмкинлеге тураһында мәсьәлә тикшерелгәнлеген белдерҙе. Вейцман, Палестинаға ҡорал ебәреүгә Эмбарголың бөтөрөлөүе «беҙҙең имшиселегебеҙ өсөн бик ҙур әһәмиәтле булып тора» һәм Эмбарго мөмкин тиклем тиҙерәк бөтөрөлөргә тейеш, тип Трумэнға аңлатырға тырышыуын белдерҙе. Вейцман, Трумэндең яуабын белдерә алмауы тураһында әйтте, ләкин быны эшләнә аласағы тураһында Трумэндең ышандырыуын әйтте. Заем алыу мөмкинлеге тураһындағы мәсьәләгә ҡағылып, Вейцман, Израиль государствоһына хәрби һәм башҡа ихтыяждар өсөн 90—100 миллион доллар аҡса талап итеүе, тип белдерҙе.

Вейцман шулай уҡ дипломатик вәкилдәр менән алышыу һәм башҡа мәсьәләләр буйынса Трумэнға хат тапшырыуы тураһында белдерҙе.

Арҙағаны һорауҙарға яуап биреп, Вейцман, Израиль государствоһының армияһы таңкыларға, самолеттарға һәм артиллерияға мохтаж, тип белдерҙе. Израиль государствоһы хөкүмәте [illegible] файҙаланыу өсөн Англия армияһынан [illegible]

Вейцман [illegible] ваҡиғала Израиль государствоһының армияһы [illegible] Акра һәм Яффаның эвакуацияланасаҡ, тип белдерҙе. [illegible]

Англия-Америка мөнәсәбәттәренә ҡарата

НЬЮ-ЙОРК 26 май. (ТАСС). Израиль государствоһына ҡаршы ғәрәптәрҙең һуғышына Англияның ярҙам күрһәтеүе айҡанлы АҠШ Англияға финанс ярҙамын күрһәтеүҙе туҡтатһын, тип талап итеүҙәр Ҡушма Штаттарҙа көсәйә бара. Англияны Палестинаға интеүҙе хуплағаны өсөн ғәйепләп, «Нью-Йорк пост» газетаһы үҙенең редакцион мәҡәләһендә конгресте, Англия, Ҡытай һәм Бельгия үҙҙәренең ресурстарын Палестинала уларҙың хуплауы менән алып барыла торған ҡан ҡойоусы, емергес һуғышҡа ярҙам күрһәтеү өсөн түгел, ә тыныслыҡ өсөн файҙаланғанлыҡтарын демонстрациялағанға тиклем «был илдәргә Маршалл планы» буйынса ярҙам итеүҙән баш тартырға саҡыра.

Филадельфияла сыға торған «Инкуайрер» газетаһы «Хурлыҡ, Британия, хурлыҡ!» тигән редакцион мәҡәләһендә, шулай уҡ Ҡушма Штаттарҙы «Маршалл планы» буйынса Англияға средстволар ебәреүҙе туҡтатырға саҡыра.

Ай һайын сыға торған прогрессив «Протестант» журналының редакторы Лесли үҙенең матбуғат өсөн яһаған белдереүендә Англия тауарҙарына бойкот кампанияһы үткәреләсәге тураһында белдерҙе. Был кампания инглиздәр Палестинаға интервенцияны туҡтатҡанға тиклем үткәреләсәк. Лесли, «Протестант» журналы менән бәйләнешле булған руханиҙар Англияның Чикаголағы һәм Нью-Йорктағы консульстволарын тыныслыҡлаясаҡтар һәм Англия тауарҙарына бойкот иғлан итергә саҡырасаҡтар, тип белдерҙе.

Ассошиэйтед пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Вашингтондан хәбәр итеүенә ҡарағанда, ассигнация буйынса сенат комиссияһы председателе Бриджес, комиссия Америка ярҙамынан туранан-тура ғәрәп армияларын финансировать итеү өсөн ҡулланыламы икәнлеген асыҡлау менән шөғелләнәсәк, тип белдергән.

Комиссия члены Брюстер, Ҡушма Штаттар ғәрәптәр тарафынан алына торған ҡоралдар өсөн яуаплылыҡтан тулыһынса ҡаса алмайҙар, сөнки «АҠШ ленд-лиз буйынса Англияны ҡорал менән тәьмин итте», тип белдерҙе.

Макдермоттың пресс-конференцияла яһаған белдереүе

ВАШИНГТОН, 26 май. (ТАСС). Государство департаменте вәкиле пресс-конференцияла, Ҡушма Штаттар Египеттең һәм Сирияның Палестина яр буйҙарын блокадалауҙарын танымайҙар, тип белдерҙе. Макдермот, үҙған аҙнаның ахырында государство департаменте Американың Ҡаирҙағы посолы Тукаға һәм Американың Сириялағы эштәрҙә поверенныйы Меммингергә телеграммалар ебәрҙе, тип күрһәтте. Был телеграммаларҙа уларға Палестина яр буйына блокада иғлан ителеүгә ҡарата Египет һәм Сирия хөкүмәттәренә протест белдерергә һәм, АҠШ хөкүмәте «уларҙың блокадаһын законлы тип таный алмай», тип күрһәтергә тәҡдим ителә. Макдермот, АҠШ хөкүмәте Сириянан һәм Египеттән яуап алманы әле һәм, улар тарафынан был хаттарҙың алыныуын белмәй, тип өҫтәне.

Макдермот, Египет хөкүмәте Египеттең Палестина яр буйҙарына блокада яһарға уйлауы тураһында АҠШ-тың Египеттәге посольствоһына 17 майҙа информация яһағандан һуң АҠШ ошо сараларҙы үткәрҙе, тип күрһәтте.

Милли съезд саҡырыу тураһында АҠШ компартияһы милли комитетенең белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 26 май. (ТАСС). «Дейли Уоркер» газетаһы Нью-Йоркта 3—6 августа компартияның 14-се милли съезының саҡырылыуы тураһында компартия милли комитетенең белдереүен баҫып сығарҙы. «Алдағы айҙар, — тип әйтелә белдереүҙә, — ҙур ваҡиғаларға бай буласаҡтар, сөнки [illegible] тураһындағы мәсьәләне хәл итә, ә Америка халҡы донъя тыныслығы өсөн тарихи әһәмиәттәге проблемаларҙы хәл итә. Беҙҙең съезыбыҙҙың бурысы беҙҙең партиябыҙҙы Уолл-Стриттең бөтә донъяла хакимлыҡ итеүгә, фашизм һәм һуғышҡа ынтылыуына ҡаршы халыҡ көрәшенә максималь вклад индереүгә әҙерләүҙән тора. Беҙ экономик, политик һәм һайлау алды фронттарында көрәшеү юлы менән тыныслыҡ, демократия һәм социаль прогресс өсөн [illegible] беҙҙең партиябыҙҙың [illegible] Милли съезд үҙәк органдар етәкселегенең отчеттарын тыңлаясаҡ һәм улар буйынса ҡарарҙар ҡабул итәсәк. Ул [illegible] политик резолюция, һайлау алды программаһын һәм [illegible] ҡабул итәсәк. Ул устав буйынса [illegible] милли комитет һайлаясаҡ.

Съезда тиҙлем милли комитет тарафынан тапшырылған резолюция проекты тикшереләсәк, шулай уҡ үҙәк органдар етәкселегенең отчеты ҡараласаҡ».

ПАЛЕСТИНАЛА ҺУҒЫШ ХӘРӘКӘТТӘРЕ

ТЕЛЬ-АВИВ, 26 май. (ТАСС). «Голос Израиля» радио станцияһы түбәндәгеләрҙе тапшыра: Иерусалим урамдарында ҡаты һуғыштар дауам итә. Иҫке ҡалала һәр бер йорт өсөн көрәш бара. Еврейҙәрҙең «смертниктар отрядтары» [illegible] ғәрәптәрҙең [illegible]

Еврей армияһы командованиеһенең хәбәр итеүенә ҡарағанда, [illegible]

ЛОНДОН, 26 май. (ТАСС). Рейтер агентлығы хәбәрсеһенең Дамасктан хәбәр итеүенә ҡарағанда, бөгөн Сирияның премьер-министры, [illegible] Палестинала һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу тураһында Бернадоттың [illegible] рен туҡтатыу тураһындағы талабына бөгөн иртән ғәрәп илдәре үҙҙәренең яуаптарын ебәрҙеләр, тип белдергән. Премьер-министр, талап кире ҡағылды, тип белдерҙе, ниндәй ҙә булһа аңлатыуҙар бирергә баш тартҡан.

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА



Һүрәттә: Өфө Ленин орденлы нефть эшкәртеү заводының [illegible] тура һәм ял итеү паркынан Ағиҙел күренеше.

Г. Буравин фото-этюды.

БАҪЫУ СТАНЫНДА ҺАТЫУ

Ҡариҙел сельпоһы районда иң ҙур сельполарҙың береһе. Ул 12 колхозды һәм район үҙәген хеҙмәтләндерә. Сельпо председателе иптәш Зәйнуллин сельпоға килгән нәмәләрҙе колхозда баҫыу стандарында һатыуҙы ойоштороҙо. Күптән түгел генә алынған тауарҙарҙан колхозсыларға, тракторсыларға 6 мең 200 һумлыҡ һабын, 8 [illegible] 130 һумлыҡ метрлы тауар, 12 [illegible] һумлыҡ тегелгән кейемдәр, [illegible] һәм башҡа нәмәләр — 43 [illegible] һумлыҡ башҡа төрлө кил [illegible] ныу тауарҙары һатылды. Тик [illegible] Молотов исемендәге колхоз [illegible] дәре генә 8 мең һумлыҡ тауар [illegible] тып алдылар.

Яңы гидроэлектр станция төҙөлә

БӨРӨ. Бөрө йылғаһы буйында 360 киловатт ҡеүәтендә ҙур гидроэлектр станция төҙөлә башланы. Ул 27 колхозды эсенә алған 10 ауыл советең хеҙмәтләндерәсәк.

Бында төҙөү материалдары әҙерләүҙә 120 кеше эшләй. Хәҙер 1.124 кубометр ағас һәм 350 кубо[illegible] таш әҙерләнде. 12 тонна [illegible] килтерелде.

Бөйөк Октябрҙең XXXI йыл[illegible] тына станция эксплоатацияға [illegible] ҡырыласаҡ.

Күп станоксылар

Стәрлетамаҡтағы төҙөлеш машиналары етештереүсе заводта 20 комсомолец-йәштәр бригадаһы эшләп килә. Рәис Киҫәбулатов етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы алдынғы сафта бара. Бригада члендәре күп станоктарҙы хеҙмәтләндерәләр һәм бирелгән заданиеларҙы икеләтә арттырып үтәйҙәр. Бригадир үҙе биш станокты хеҙмәтләндерә. Айырым көндәрҙә ул 2,5—3 норма эшләй.

Комсомолецтәрҙән Павел Я[illegible] һәм Александр Баталов етәк[illegible] иткән сборщиктар бригада[illegible] үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Был б[illegible] гада члендәренең күбеһе [illegible] йыллыҡ нормаһы, ә бригада[illegible] үҙҙәре бишәр йыллыҡ нор[illegible] үтәнеләр.

Завод коллективы валовой [illegible] дукция эшләп сығарыу һәм [illegible] частәр әҙерләү буйынса яртыйыл[illegible] лыҡ планды үтәне.

Черниковск физкультурниктәре йәйге сезонда

Черниковск ҡалаһында физкультура һәм спорт эштәренә ҙур иғтибар бирелә. Бында 50 урынлы спорт майҙаны төҙөлә, нефть эшкәртеү заводының культура һәм ял паркы төҙөкләндерелә.

Ҡаланың футболистәре ҡала һәм Башҡортостан кубогы өсөн булған ярышҡа әҙерләнәләр. Ҡаланың алдынғы волейбол командалары өлкә-ара ярыштарҙа ҡатнашыу өсөн Саранск ҡалаһ[illegible] китәсәктәр.

Хәҙер Черниковск — Ҡ[illegible] араһында үткәреләсәк мотоц[illegible] кросына ҙур әҙерлек алып бар[illegible] ла. Был мотокроста еңеүсе[illegible] РСФСР беренселеге өсөн Сер[illegible] хов ҡалаһында үткәреләсәк [illegible] цикл ярыштарында ҡатнаша[illegible] тар.

Әлфиә

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

Һуң Ленинград кешеләре тағы ла барыһынан да яҡшыраҡ эшләй башланылар. Уларҙың беҙгә хат ебәргәнлектәрен ишеттеңме?

— Беҙгә?

— Эйе, бөтә Россия эшселәренә, — тине ул, — төшкө аш ваҡытында ҡыҙыл мөйөшкә инегеҙ. Мөрәжәғәтте уҡыясаҡбыҙ.

Илдар расточканы тикшереп ҡараны, перерывтан файҙаланып:

— Һорарға рөхсәт итегеҙ? — тине.

— Тыңлайым.

Илдар аҙыраҡ ҡаушап ҡалған шикелле булды һәм Филипп Филипповичкә ҡарап ҡыйыу ғына әйтте:

— Беҙҙең арала ғына булһын. Мин үҙ турамда әйтергә теләмәйем, башҡалар тураһында хәстәрлек күрәм. Әйбәт ҡыҙ ул үҙе, ләкин минең дуҫымды яратмай, «данлыларҙы ғына һөйәм», ти ул. Шулай дөрөҫмө?

Филипп Филиппович, көләүенән тыйылды.

— Беләһеңме, йәш егет, был мәсьәләлә рецепт юҡ бит... Уйлап ҡарағанда ни өсөн инде ул ябайҙарҙы ғына һөйһен. Икенсе яҡтан ҡарағанда, — тип дауам итте ул һүҙен, — тырышып эшләүсе ҙур ихтирамға һәм мөхәббәткә хаҡлы түгелме. Дөрөҫмө? Һеҙ үҙегеҙҙең дуҫығыҙға нисек яуап бирҙегеҙ?

— Мин уға бер нисек тә яуап бирмәнем, — тип әйтте Илдар ишетелер-ишетелмәҫ кенә.

Ҡыҙыл мөйөштә, беседа ваҡытында Илдар иң артта, ишек төбөндә ултырҙы. Бына улар, уның иптәштәре, мөрәжәғәттең ҡайнар һүҙҙәрен тыңлап ултыралар. Бәлки, һуғышта һөжүм алдынан да шулай приказ уҡығандарҙыр, һәм ҡапыл Илдар һуғышта була алмағанлығы тураһында хәтерләне.

— Алыҫ Ленинград, тыңла...

— Кемдәр достоин яуап бирергә теләй, шулар ҡулдарын күтәрһен, — тип ҡыҫҡырҙы Филипп Филиппович.

Бөтә ҡулдар күтәрелделәр. Ләкин Филипп Филиппович бик риза түгел ине әле.

— Барыһы ла күтәрҙеме? — тине ул.

Илдар оҙон бармаҡлы, ҡеслө ҡулдарын бейек күтәрҙе, үҙенең риза булғанын башҡаларға ла күрһәтәһе килде. «Был ҡул — артҡа ҡалдырмаҫ. Шикләнмәгеҙ, Филипп Филиппович» тип уйланы йәш токарь. Василий ҙә, унан һуң Ғүмәр ҙә ҡулдарын төшөрҙөләр. Ни өсөп һуң Әлфиә лә ҡул күтәрҙе? Конторщицаның ярышҡа ҡатнашыуын бер кем дә һорамаңы бит...

Ошо көндән алып бөтәһе лә бер-береһенең хеҙмәтен ентекләп баһалай башланылар. Ярыштың мәғәнәһе бөйөк. Барыһы ла йөгәрәү юлында торған кеүектәр ине. Кем алдыҡ? Кем яҡшыраҡ?

Стахановсылар юлына баҫҡан кешегә һис тә туҡталыу юҡ. Ул һәр ваҡыт эҙләнә. Хәҙергә алла барған Василий һәм Ғүмәрҙең хеҙмәтенә Илдар иғтибар менән ҡарап торҙо. Улар кистән үк инструменттәрҙе әҙерләп ҡуялар. Илдар ҙа шулай эшләй башланы. Улар чертежларҙы өйрәнделәр, станоктарҙың тиҙлеген ҡаранылар, артыҡ хәрәкәттәрҙе бөтөрҙөләр, секундтарҙы һананылар... Бөгә цехтың иғтибары ғына, ленинградлыларға биргән вәғәҙәне тотоу теләге генә түгел, ә оҙон керпектәр аша йылмайған ике ҡара күҙ ҙә кешене тырышырға ҡуштты. Графиктәге күтәрелә барған һыҙыҡты күреп ҡыҙ нәмә уйланы икән? Илдар дуҫтарын ҡыуып етә башланы.

— Бағдановтың һуңғы декадаһы миңә бик оҡшай, — тине мастер Семен Федорович, цех йыйылышында.

Йыйылыш аҙағында ҡарт эшсе, аҡыллы кеше, цех начальнигы былай тине:

— Илдар Бағдановҡа айырым бурысты үтәгәне өсөн рәхмәт белдерәм.

Шунда Әлфиә лә ултыра һәм һарғылт тышлы дәфтәргә нәмәләр яҙа ине.

Аңлашылмаусылыҡ мәңгелек нәмә түгел, тормош һәр ваҡыт уны хәл итеү юлын таба. Заводтың бәләкәй генә цехындағы кешеләр ҙә матур дөрөҫлөктә үҙҙәренсә эшләнеләр.

Иртәнсәк Илдар йыуып ҡуйылған кеүек таҙа станок артына баҫты. Цех эшселәр менән тулды. Ғүмәр килеп инде һәм шунда уҡ киса киске яңылыҡтарҙы һөйләй башланы. Василий, гәзиттә иптәштәре менән һирәк аралашыусы, киске мәктәптә уҡығанлыҡтан, бер нәмәгә лә ваҡыт таба алмайынса тиҫ йөрөүсе егет, гәзиттә-геса тыныслыҡ менән әйтте:

— Хәйерле иртә, Илдар. Әҙерме?

Цехтың арғы башында мастер йәш өйрәнсек Никитаны, нисектер һалҡын һәм елҡау хәрәкәтле егетте, әрләп тора ине. Бөтә нәмәгә лә бик аҡрын ҡуҙғалыусан ине шул ул Никита.

Смена башланыр алдынан ғына Ғүмәр Илдарҙы эшенән бүлде.

— Әйләнеп ҡарасы, айыу, Малышев станогы артына кем килеп баҫҡанын күрәһеңме? — тине ул, дуҫтының терһәгенә төртәп, аҡрын ғына әйтте.

Илдар шунда уҡ әйләнеп ҡараны һәм үҙенең күҙҙәренә ышанманы: институтҡа уҡырға киткән Малышевтың станогы артында... Әлфиә баҫып тора ине.

— Ул ниңә бында?

Илдарҙың уйҙарын белгән һымаҡ, Ғүмәр тыныс ҡына әйтте:

— Иҫеңдәме сменанан һуң ул мастер эргәһендә өйрәнергә ҡала икән, тип әйтә инем бит... ышанмай инең. Хәҙер өйрәнеп еткән ти инде, ысынлап әйтәм.

Илдар уны тыңламаны. Ул әлегә хәлгә бер юлы ғына төшөнөп етә алманы: Әлфиә уның артында ғына, бөтөнләй яҡында ғына, станок эргәһендә тора. Мотор тоҡандырылды, һәм биш тиҫтә станок шауында уйҙар түгел, бөтә тауыштар юғалып ҡалды. Үҙ станогын ебәргәс, Илдар әлеге ҡыҙ яғына бер секунд эсендә генә ҡарап алды.

Уның эргәһендә йә цех начальнигы, йә Филипп Филиппович үҙе, ә бөтәһенән дә йышыраҡ мастер — элекке сержант — килеп-килеп киткеләйҙәр ине.

— Ҡарап эшлә, бәләгә ҡалып брак яһап ҡуйма! — Илдарҙың күҙ ҡарашын тотоп алып Василий шулай тип өндәште һәм ҡысҡырып көлдө.

— О, юҡҡа хафаланма, брат, — тип теләмәйенсә, тупаҫ ҡына яуап ҡайтарҙы токарь.

Перерыв башланырҙан бер нисә минут элек кенә Илдар мастерҙең Филипп Филиппович менән йәкәүләп проходта һөйләшеп тороуҙарын ишетте.

— Аптырамаҫ ерендән аптырарһың, ниндәй тырыш ҡыҙ был...

— Ысын талант, катура! — әйтелгән фекер менән мастер бик теләп килеште. — Өс сәғәт эсендә илле деталь... тиҙҙән ул ҡайһы берәүҙәрҙән уҙҙырып ебәрер.

Илдар иренен тешләне, тынғыһыҙ уйҙарҙан маңлайына береңсе тапҡыр йыйырсыҡтар сыҡты. Филипп Филиппович уның, Илдарҙың, эше менән дә ҡәнәғәт булһын ине бына, маҡтаһын ине.

— У, брат, ҡыҙҙыр эйҙә. Унан ике тапҡыр артығыраҡ эшләнем. Ике тапҡыр, — тине ул үҙ-үҙенә, станоктың ҡыҙыулығын арттырҙы.

Машина уны тыңланы, берҙәй тигеҙлектә шаулап, тиҙ-тиҙ генә шул бер үк һүҙҙе ҡабатлағандай булды:

— Ике... ике... ике...

Төшкө ашҡа туҡталғас, Әлфиә столовойға китте. Ҡайтанан эшкә тотонор алдынан Илдар эргәһенә килеп һүҙ ҡушмаҡсы булғайны ла, Әлфиәне егеттәр бөтәһе лә бер юлы тип әйтерлек уратып алдылар. Илдарҙың машинаһы [illegible] элекке кеүек тиҙ-тиҙ һулыш [illegible] ды.

— Ике... ике... ике...

Илдар үҙ ғүмерендә бер [illegible] ҡытта ла гудок бирелер минут[illegible] бөгөнгөләй көтмәгәйне. Уның [illegible] дында ҙур төгәллек менән эш[illegible] гән, ялтырап торған йөҙҙәрсә [illegible] таллар ята ине инде. Үс иткән [illegible] келле көтмәгәндә генә мастер [illegible] мен Федорович килеп һүҙ ҡуш[illegible]

— О, бына был эш. Иҫәп[illegible] ҡараңыҙмы әле?

Илдар иҫәпләп ҡарамайынса [illegible] бөгөн үҙенең күпме эшләгәнен [illegible] лә бик инде.

Мастер һүҙен дауам итте[illegible]

— Тағы ла өс сәғәттән авто[illegible] титуттан килгән профессор к[illegible] та сығыш яһаясаҡ. Металды [illegible] ҡын килеш эшкәртеү тураһ[illegible] бик ҡыҙыҡлы лекция — об[illegible] тельно кил.

— Ярай, — тине Илдар, [illegible] тәре менән бергә цехтан сы[illegible] барыусы Әлфиәгә тыныслыҡ [illegible] ҡарап алды. — Ярай.

Ләкин мастер уны ебәрмә[illegible]

— Никитаға ярҙам итергә к[illegible] булыр. Ишетәһеңме? Уның [illegible] нән шефлыҡ итмәҫһеңме? Юҡ [illegible] цех түбән тағәрәргә тора, бит.

— Ярай, — тине Илдар.

Мастер һөйләшер өсөн яң[illegible] яңы темалар таба торҙо. [illegible] Илдар түҙмәне.

— Ярай, ярай. Бөтәһен дә [illegible] ләрмен! — тип ҡысҡырҙы ла, [illegible] тан йүгереп сығып та китте.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26

П 00763. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

29-сы йыл сыға

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

1948 йыл
№ 107
30
май
йәкшәмбе
Хакы 20 тин

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башкорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Яҙғы сәсеү планын ваҡытында үтәү — һәр бер колхоздың изге бурысы. (1-се бит).
Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлеге ойоштороу комитетында. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. З. Нафиков. — Партия конференцияларында асылған етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөргә. (2-се бит).
Н. Шаталов.—Игеп ҡабул итеү пункттарын алы әҙерләккә килтерергә. (2-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
С. Мәүлютов. — Эшсе кадрҙарҙың техник белемен әҙләкһеҙ күтәрергә. (2-се бит).
З. Ишбулатов. — Алдынғы трактор бригадалары хужалыҡ иҫәбенә күстеләр. (3-сө бит).
Б. Сафин. — Колхозға яңы трактор килгәс. (3-сө бит).
М. Тажи. — Еңелгән тел. (3-сө бит).
Комбайндарҙы Божор МТС-ы кеүек ремонтларға. (3-сө бит).
Халыҡ-ара күҙәтеү. (4-се бит).
Бөҙҙең республикала. (4-се бит).
Японияның компартияһы секретаре Носакаһың белдереүе. (4-се бит).

Пар һөрөү планын срогында тулыһынса үтәргә

Быйыл яҙҙың һуңлап килеүе һәм һауа торошоноң үҙенсәлектәре бөтә төр баҫыу эштәрен бергә бәйләп алып барыуҙы талап итә. Баҫыу эштәрендә нәүбәтселеккә юл ҡуйыу зарарлы һәм ул государствоға, колхозға бик ҡиммәткә төшә.

Республикабыҙҙың колхоздары, МТС һәм совхоздары сәсеү планын ошо көндәр эсендә үтәүҙе тәьмин итеү менән бергә, киләһе йыл урожайы тураһында ла хәстәрлек күрергә тейештәр. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары социалистик ауыл хужалығы работниктәре алдына 1949 йылда иген етештереүҙе һуғышҡа тиклемге кимәлгә еткереү һәм уны байтаҡ үҙып китеү бурысын ҡуйҙы. Был бурысты уңышлы үтәү быйыл ужым культураларын үҙ ваҡытында яҡшы эшкәртелгән ергә сәсеүгә бәйләнгән. Ә иртә пар ужым культураларының урожайын күтәреүҙә, игенселектең культураһын үҫтереүҙә мөһим сара булып тора.

Пар ере иң тиклем иртә һөрөлһә, урожай шул тиклем юғары була. Республикабыҙҙың алдынғы колхоздары һәм юғары урожай мастерҙәре үҙҙәренең күп йыллыҡ эш тәжрибәләрендә быны яҡшы күрҙеләр.

Быйыл бөтәһе 850 мең гектар майҙанда пар һөрөү үткәрелергә тейеш. Колхоздарҙа һәм МТС-тарҙа булған мөмкинлектәрҙе иҫкә алып, ағымдағы йылда һөрөү срогы, үҙған йылға сағыштырғанда, күп ҡыҫҡартылды. Үҙған йыл пар һөрөү срогы 20 июнгә билдәләнһә, быйыл 10 июндән дә һуңға ҡалмай планды тулыһынса үтәү бурысы ҡуйылды. Алдынғы колхоздар үҙҙәрендә булған мөмкинлектәрҙе дөрөҫ файҙаланыу арҡаһында сәсеүҙән иң ыҡмау ваҡытында уҡ пар күтәреүгә тартыу көстәре бүлделәр һәм яҙғы баҫыу эштәре тамамланыу менән уҡ улар бөтә көстө был мөһим эшкә тупланылар. Балтас районының Куйбышев исемендәге колхозы 15 майҙа уҡ 500 гектар майҙанда иртә культуралар сәсеүҙе тамамлап, шул көндә уҡ эш аттарын күпселек өлөшөн һәм иң яҡшы һабандарҙы пар һөрөүгә ҡушты. Шуның һөҙөмтәһендә колхоз ошо айында 100 гектарҙан артыҡ майҙанда пар һөрөп ташланы. Дәүләкән районы «Башҡортостан» ауыл хужалығы артеленә лә бөтә бригада һәм звенолары пар һөрөү планын срогында алда үтәү өсөн ярышҡа ҡалҡтылар.

Май айы—пар һөрөү өсөн иң яҡшы срок. Ләкин бөтә райондарҙа тип әйтерлек был ҡиммәтле ваҡытты ҡулдан ысҡындырҙылар. Май айы графиге өҙәлде. Хатта сәсеү планын тулыһынса үтәү алдында торған Туймазы, Салауат, Балтас, Яңауыл, Дәүләкән, Ҡандра райондары ла был эшкә май аҙаҡтарында ғына башланылар.

Салауат районында сәсеүҙән бушаған бөтә тракторҙарҙы һәм эш аттарын күптән үк инде ер һөрөүгә ҡушырға мөмкин ине. Районда 8 колхоз ғына был эшкә башлаған һәм ни бары 200 гектар пар һөрөлгән. Ҡандра районы колхоздары 10 мең гектар майҙанда пар ере эшкәртергә тейештәр. Ләкин май аҙаҡтарына тиклем был эшкә бер генә колхозда ла тартыу көстәре һәм тракторҙар бүленмәне. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Хәмитов һәм баш агроном Таһиров иптәштәр быға икенсе нәүбәттәге эш, уның менән көҙ көнө лә шөғелләнергә була, тип ҡарайҙар һәм, үҙған йылдарҙағы кеүек, быйыл да парҙы көҙ көнө генә һөрә башларға уйлайҙар.

Быйыл һәр бер районда, колхозда һәм МТС-та пар ерҙәрен эшкәртеү планын хөкүмәт тарафынан билдәләнгән срокта арттырып үтәү өсөн тулы мөмкинлектәр бар. Бының өсөн сәсеү эштәренән бушаған һәр бер трактор һәм эш аты һис кисекмәҫтән был эшкә ҡушылырға тейеш. Пар һөрөүҙең уңышы МТС-тарҙың үҙ эштәрен ҡырҡа яҡшыртыуҙарына бәйләнгән. Быйыл тракторҙар менән 650 мең гектар пар һөрөлергә тейеш. Был үҙған йылға ҡарағанда 50 мең гектарға артыҡ, тигән һүҙ. Эш күләменең артыуы һәм һөрөү срогының бик ҡыҫҡа булыуы МТС етәкселәренән һәр бер машинаны тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙы, хеҙмәт етештереүсәнлеген бик ныҡ күтәреүҙе талап итә. Беҙҙә әле был эштә файҙаланылмаған мөмкинлектәр күп. Тракторҙар тәүлек буйына эшләргә тейеш. Техник тәртиптә булмағанлыҡтан машиналарҙың тик тороу факттары ла булып тора. Был етешһеҙлектәр тулыһынса бөтөрөлөргә, һәр бер трактор тәүлек әйләнәһендә бер туҡтауһыҙ эшләргә тейеш.

Эштең сифаты өсөн көрәш һәр бер тракторсының һәм һабансының бөйөк бурысы. Агротехник талаптарҙан сигенеү урожайҙы түбәнәйтеүгә килтерәсәк. Ер предплужниклы һабандар менән генә һөрөлөргә тейеш. Пар ерҙәре һөрөлгән көндө үк тырматылырға тейеш. Пар ерҙәрендә йәй буйына көнендә ос таҡыр культивация үткәрелергә тейеш һәм һәр ваҡытта таҙа, йомшаҡ хәлдә тоторға кәрәк. Район ауыл хужалығы бүлеге, МТС агрономдары, колхоз етәкселәре һәм трактор бригадаһы бригадирҙары эштең сифаты өсөн тулы яуап бирергә бурыслы. Пар ерҙәрен һөрөү алдынан тиреҫ һәм башҡа ашламалар сығарыу урожайҙы күтәреүҙә ҙур роль уйнай. Баҫыусылыҡ бригадалары, звенолар был сараны киң ҡулланырға тейештәр.

Республикабыҙҙың партия һәм совет ойошмалары киләһе йыл урожайына ныҡлы нигеҙ һалып ҡалдырыу — пар һөрөү планын срогында арттырып үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр.

Яҙғы сәсеү планын ваҡытында үтәү—һәр бер колхоздың изге бурысы

Пландан тыш сәсәләр

МАЛАЯЗ. (Телефон аша). Салауат районында яҙғы сәсеү эштәре ҡыҙыу темп менән алып барыла. 25 майға 23 колхоз бойҙай сәсеүҙе тамамланы.

«Партизан Мырҙа» колхозы (председателе иптәш Хушин) пландан тыш 46 гектар бойҙай сәсте. «Новая жизнь» колхозы ла пландан тыш ашлыҡ сәсә.

Малаяз МТС-ы колхоздар менән төҙөгән договорҙы уңышлы үтәй. Иптәш Насировтың трактор бригадаһы яҙғы һөрөү планын 140, иптәш Исламов бригадаһы 154 процентҡа үтәне. Тракторҙар төндә лә, көндөҙ ҙә туҡтауһыҙ эшләйҙәр.

Ә. Садикова.

* * *

ШАРАН. Фрунзе исемендәге колхоз 310 гектар урынына, 345 гектар һабаҡ ашлыҡ культуралары сәсте. Шул иҫәптән пландан тыш 67 гектар бойҙай сәселде. Колхоз хәҙер һуңғы культуралар сәсеүҙе тамамлай.

Ф. Шакиров.

Һаҡмар совхозы сәсеү планын арттырып үтәне

Һаҡмар совхозы коллективы яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы тамамланы. Бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү планы 104 процентҡа үтәлде.

Хәҙер бөтә тракторҙар ҙа пар һөрөү эшенә башланылар. Трактористар был мөһим эште лә үҙ ваҡытында үтәп сығыу өсөн көрәшәләр.

К. Сафин.

Трактор бригадаларына техник ярҙам юк

Яҙғы сәсеү өсөн иң яҡшы агротехник сроктар үтеп китте. Ә Баҡалы МТС-ы тракторҙарының яҙғы эш планын үтәүҙән бик алыҫ тора әле.

Тракторҙар паркы баҫыу эштәрендә насар файҙаланыла һәм уларҙың хеҙмәт етештереүсәнлеге бик түбән. Бында бер айҙан артыҡ ваҡыт эсендә һәр бер тракторға уртаса ни бары 61-әр гектар ер эшкәртелде. «Комсомолец», «Смычка», «Новый путь», «Урак-сукеш», «Знамя ударника» колхоздарына беркетелгән тракторҙар әле булһа ныҡлы эшкә башланмағандар.

МТС етәкселәре тракторҙарҙы ҡайҙа теләйҙәр, шунда күсерәләр. «Новый путь» колхозында сәсеү эштәре өҙәләүгә ҡарамаҫтан, МТС партия ойошмаһы секретаре иптәш Гордиков айырым кешеләрҙән картуф ерҙәрен һөрөү өсөн «У—2» тракторын файҙаланырға рөхсәт итә. МТС директоры вазифаһын үтәүсе иптәш Мерзляков та «Смычка» колхозындағы тракторҙарҙы айырым, дуҫ-иштәренең картуф ерҙәрен һөрҙөрә.

Трактор бригадаларына техник ярҙам күрһәтелмәй. Ошо көнгә тиклем бында күсмә мастерской булдырылмаған. Тракторсылар кәрәкле инструменттар менән тәьмин ителмәгәндәр. Шул сәбәпле улар бәләкәй генә ремонт өсөн дә МТС-ҡа барырға мәжбүр булалар. Иптәш Туйдимиров етәкселек иткән бригаданың тракторҙары ватылып, 14 смена тик ултырҙылар. «Память Ленина» колхозындағы «НАТИ» тракторы 10 көн буйына ни бары 12 гектар ер һөрҙө. Ә был тракторҙы хеҙмәтләндереү өсөн колхоздан беркетелгән 6 эш аты [illegible] 25 гектар ер һөрөп [illegible].

МТС-тың өлкән механигы иптәш Ушаков трактор бригадаларына техник ярҙам һорап килеүселәргә:

— 14 бригаданың бөтәһенә лә шундай уҡ хәл, уларҙың барына ла нисек хеҙмәтләндереп өлгөрөһең?—ти.

«Красная баррикада» колхозын хеҙмәтләндереүсе тракторсылар МТС-тан бер тапҡыр ҙа ярҙам алмағас, тракторҙы һүтеп арбаларға һалып МТС мастерскойына килтерергә мәжбүр булдылар.

Бында был етешһеҙлектәр МТС етәкселәренә һәм колхоздар менән төҙөлгән договорҙы үтәүгә ситтән ҡарау менән генә аңлатыла. МТС-тың [illegible] эштәрен әҙәүгә алып барыу [illegible] һөҙөмтәһендә һәр бер трактор [illegible].

Х. Ғәлимов.

ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРҘЕҢ ЯРҘАМСЫ ХУЖАЛЫҒЫНДА

Черниковск ҡалаһының совхоздарында һәм ҡала эшсе хужалыҡтарында баҫыу эштәре ҡыҙыу темп менән бара. Бөгөнгө көнлә машиналар төҙөү заводының эшселәр тәьминәте бүлеге совхозында бөтә сәсеү майҙанының 1854 гектары сәселде. Шулар эсенән 1214 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары, 218 гектар картуф сәселеп, план 62 процентҡа үтәлде.

Ғафуризә агротехниканы боҙалар

КРАСНОУСОЛ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Кызыл яр» колхозының баҫыуҙары алыҫтан тигеҙ, матур булып күренәләр. Ләкин был ерҙе яҡынлашһаң, күренеш үҙгәрә, һөрөлмәй ҡалған ерҙәр, ваҡламаған эре-эре кәҫәктәр, тигеҙһеҙ бураҙналар күҙ алдына килеп баҫа. Бында ошо ерҙәр өсөн бер нисә ҡатлы сорнак кәрәк. Баҫыу өҫтәндә кәсәктәр күп ята. Колхоз етәкселәре ерҙе ғәрәбәләп эш бойҙайҙар. Сәсеүгә [illegible] ерҙәргә [illegible] бойҙай сәсеүҙе [illegible] ер.

Эштең сифатына бер ниндәй ҙә иғтибар бирелмәй, агротехниканың хатта ябай ғына ҡағиҙәләре лә үтәлмәй. Культиваторҙар күп менән һорала, сәсеүҙе әҙерлек ерҙә сағында ғына уларҙы сәсеүгә [illegible].

— Өлгөрәбеҙ булмай бит, ул ҡай итәйһең һуң, — ти колхоз председателе иптәш Хәбибуллин.

Агротехниканың боҙоу фактылары башҡа колхоздарҙа ла бик күп. Киров, Молотов исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндереүсе Бурлы МТС-ының тракторсылары ерҙе 8—10 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрәләр. Ат менән һөрөүсе лә тәрәң итеп һөрөү күҙҙә тотолмай. Һуңғы көндәрҙә тағы ла һөрөлгән ер ҡалмағас, бөтә колхоздарҙа ла тип әйтерлек сәскәстәр ташлап, күп менән сәсеү башланылар. Агротехниканы былай тупаҫ рәүештә боҙоуға район һәм бөтә колхоздарҙа ла күпләп етешмәүгә һылтайҙар.

«Кызыл саскул» колхозында ике сәскес була тороп, 40 гектар бойҙайҙы ҡул менән сәсәләр. Шуның 5 гектарға яҡыны һөрөлмәгән ергә сәселгән, унда һуңынан ғына культивация үткәрелгән. «Украинец», «Кызыл булак» колхоздарында сәселгән орлоҡтарҙың 15—20 проценте ерҙе күмелмәйенсә ҡалған.

Был турала район ауыл хужалығы бүлегенә яҡшы беләләр. Көн һайын колхоздарҙан бирелә торған сводкала нисә гектар ҡул менән сәселеүе тураһында күрһәтелеп барыла. Ләкин район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Камалетдинов, өлкән агроном Шаһитов иптәштәр агротехниканы тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйыусы колхоз етәкселәренә үҙ ваҡытында хатта сара күрәге урына, уларҙы был эштәре өсөн маҡтайҙар һәм дәртләндереләр.

— Аттарҙы ер һөрөүгә бүлегеҙ, ә сәсеүҙе нисек үткәрәгеҙ үҙегеҙ ярай, — тиҙәр улар.

Ғ. Котлобаев.

„Өлгөрәрбеҙ әле..."

АСҠЫН. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район ауыл хужалығы бүлеге колхоздарҙа пар һөрөү эшенә етәкселек итмәй.

— Колхоздар пар һөрөләрме?— тигән һорауға районның баш агрономы иптәш Галицкий:

— Һөрәләр, уларға график бирелгән, — ти. Ул һүҙен әйтеп тә бөтмәне, статистик Рудакованың:

— Нина, кәмме пар һөрөлгән?— тип һорауы.

— Ул турала әле сводка юҡ, колхоздар пар һөрөүгә башламағандар, — тине ул иптәш Рудакова.

Район ауыл хужалығы бүлеге пар һөрөү графигенең үтәлешен тикшермәй. График буйынса 10 майҙан алып, 20 майға тиклем районда 2 мең 477 гектар майҙанда пар һөрөлөргә тейеш. Ләкин график өҙелгән. Сәсеүҙе тамамлаған 18 колхоздың береһендә лә пар һөрмәй. «Муллаҡа» колхозында (председатель иптәш Ғилманиуров) сәсеүҙе тамамлауы иҫәбенә инде 10 көн үтһә ла, бер бураҙна ла пар һөрөлмәгән.

— Өлгөрәрбеҙ, әле ваҡыт күп, — ти район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Герасименко.

Ғ. Исмәғилов.

Пар һөрөү йәйелдерелдә

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Район яҙғы сәсеүҙе тамамлау алдында тора. Арттағы ҡалған колхоздар ҙа сәсеүҙе ошо көндәрҙә тамамлау өсөн бөтә көстәрен туплайҙар. «Кооператива № 1» колхозында был сәсеүҙә ярҙам итеү өсөн Туймазы МТС-ының 4 тракторы эшләй. Был колхоз быға көн һайын 15—18 гектар ашлыҡ сәсә ине, ә хәҙер 45-әр гектар сәсә башланы. «Петровский» колхозында совхозының 2 тракторы, «Игенсе» һәм Стаханов исемендәге колхоздарға Туймазы МТС-ының бер тракторы эшләй. «Баланс күл» колхозы (председателе иптәш Усманов) күршеһе Сталин исемендәге колхозға 222 гектар ер тырматты.

Райондағы 63 колхоздың яртыһы 25 майға сәсеүҙе тамамлап, массовый рәүештә пар һөрә.

Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлеген ойоштороу комитетында

Ошо көндәрҙә политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлеген ойоштороу комитетының ултырышы булып үтте. Кәңәшмә күп кенә ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе.

Беренсе көн тәртибе буйынса обществола действительный член булырға теләгән бик күп ғилми работниктарҙың, общественный деятелдәрҙең ғаризалары ҡаралды. Бөтәһе 17 кеше — обществоның действительный члены итеп ҡабул ителде. Улар араһында медицина фәндәре докторҙары профессор И. Ғ. Ҡадыров, профессор Н. А. Шерстенников, профессор Н. И. Савченко һәм башҡалар бар. Хәҙер обществоның бөтәһе 120 действительный члены иҫәпләнә. Тиҙ көндәрҙә обществоның Башҡортостан бүлегенең дөйөм йыйылышын үткәреү планлаштырылды. Бында Башҡортостан бүлегенең правлениеһе һайланасаҡ.

Ойоштороу комитетында шулай уҡ обществоға член-соревнователдәр ылыҡтырыу мәсьәләһе лә ҡаралды. Обществоның уставына ярашлы рәүештә уның член-соревнователдәре булып общество эшмәкәрлегендә актив ҡатнашҡан, лекциялар, докладтар ойоштороуҙа һәм башҡа эштәрендә ярҙам иткән кешеләр — инженерҙәр, агрономдар, уҡытыусылар һәм башҡа ғилми работниктар тора алалар. Кәңәшмәлә республикаһың күп райондарында интеллигенция йыйылыштары үткәрергә һәм обществоның эшен йәйелдерергә ярҙам итеү өсөн урындарҙа булышлыҡ итеү группалары төҙөргә ҡарар ителде.

Ойоштороу комитеты шулай уҡ яҡын көндәрҙә уҡыласаҡ лекцияларҙың темаларын ҡараны.

Туймазы колхоздарында

Яҙ көнө бигерәк матур Туймазы баҫыуҙары. Ҡара ахаҡ кеүек ялтырап тора һөрөлгән ерҙәр. Хәтфә кеүек йәйелеп ята йәшел ужымдар. Алыҫта бик күп вышкалар күренә.

— Беҙҙең ерҙең аҫтында ҡара алтын, ә өҫтөндә — бойҙай, иген алтыны, — ти ВКП(б)-ның Туймазы райкомы секретаре иптәш Баранов.

Беҙ алыҫ колхоздарға барабыҙ. Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинға күптән түгел яҙған хатында туймазылыларға 29 юл урын бирелгән. Был юлдарҙа ҙур мәғәнә ята, игең өсөн көрәштә колхозсыларҙың, механизаторҙарҙың, специалистарҙың ҙур теләге каҙҙалана. Улар, баҫыу стахановсылары, 1948 йылда юғары урожай яулап алырға һәм совет Башҡортостанының 30 йыллығын ғорурланырлыҡ еңеүҙәр менән ҡаршыларға һүҙ бирәләр. Сәсеү майҙанын 4 мең гектарға киңәйтергә, бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан уртаса 75—80-шәр бот урожай алырға кәрәк. Хатта ике алдынғы колхоздың — «Тимер» һәм Туҡаев исемендәге колхоздың йөкләмәләре күрһәтелә. Беҙҙең ул колхоздарҙа булаһы һәм уларҙың бөйөк вәғәҙәне нисек үтәүҙәрен күрәһе килә.

Машина алға бара. Юлдың ике яғында ла баҫыу эштәре ҡайнай.

— Быйыл яҙ һуңлабыраҡ килде, — ти иптәш Баранов. — Ләкин ул беҙгә ҡомасауламаны. Киреһенсә, кешеләр сәсеүҙең срогын ҡыҫҡартыу өсөн тупландылар һәм үҙ маҡсаттарына өлгәштеләр.

Секретарь бер нисә һан әйтә. Улар үткән йылдың ошо ваҡытына ҡарағанда, быйыл икеләтә күберәк эшләнгәнлеген күрһәтәләр. Былтыр был ваҡытҡа районда сәсеүҙе тамамлаған бер генә колхоз да юҡ ине, ә хәҙер улар тиҫтәләп иҫәпләнә. Бөтә яҙғы бойҙайҙы — 11 мең гектар, иртә срокта сәселде.

Алда — ауыл. Яңы ҡоймалар, өйҙәр тирәһендәге йәшел баҡсалар күренә. Был — Туҡаев исемендәге колхоз. Ауылға инеү менән, беҙ ғәжәпкә ҡалабыҙ — бөтә кеше ауылда. Бәләүҙәр баҡсаларҙа эшләйҙәр, икенселәр тимерлеккә бесән саңҡыстар килтерә. Был күренешкә ҡарап, Барановтың йөҙө үҙгәреп китә.

— Нинә баҫыуҙа түгел? — тип һорай ул урам буйынан килгән сәскестә эшләүсе Әнүәр Ибәтуллиндән. Әнүәр яуап урынына йылмая һәм аңлайышлы, һәр кемдең йөрәгең шатландырырлыҡ ике һүҙ әйтә.

— Сәсеүҙе тамамланыҡ!

Шулай булып сыҡты: колхоз ҡуҙаҡлы культуралар сәсеүҙе кисә иртән, ә картуф ултыртыуҙы кис бөтөргән икән.

— Тағы ла бер колхоз беренсе алдынғы иҫтәгә инде, — ти секретарь һәм Әнүәргә рәхмәт әйтеп, машинаға ултыра. — Улай булғас, бында минә лә эш бөткән инде. Халыҡ аҡлы, тырыш, юлбашсыға биргән вәғәҙәһен үтәр. Ә бына «Тимер» колхозына инеп сығыу урынлы булыр.

Шофер машинаны икенсе яҡҡа бора. Орлоҡ, картуф тейәгән йөктәр, тракторҙар, автомашиналар осрайҙар. Райком секретаре машинаны йыш ҡына туҡтатыра, осраусыларҙан һораша, кәңәштәр бирә.

Бына был «Тимер» колхозы. Ауылда иң яҡшы йорт — колхоз правлениеһе урынлашҡан йорт. Бөгөн бында айырыуса йәнлелек. Оло йәштәрҙәге колхозсылар колхоз председателе Солтангәрәй Ғимазетдиновты уратып алғандар. Шатлыҡлы тауыштар ишетелә. Иптәш Сталинға яҙған хат баҫылған газетаны һәр кемдең ҡарайһы һәм «Тимер» колхозына бирелгән бер нисә юллыҡ яҙыуҙы уҡып сығаһы килә. «Тимер» колхозының членлары 130 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 100-әр бот урожай алырға йөкләмә алдылар. Хажғәли Ғәлиуллин звеноһының 26 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 150-шәр бот урожай алырға вәғәҙә итеүе лә яҙылған. Газета парторг Фәтих Харисовтың сумкаһына һалынғас, беҙ һорау бирабеҙ.

— Сәсеү менән эштәр нисек?

— Сәсеүҙе тамамланыҡ! — тигән берҙәм яуап ҡайтарыла.

Председатель шытып сыҡҡан сәсеүлектәрҙе күрһәтергә алып китә, ул ашығып атлай. Бына ул яңы ғына йомшаҡ ер өҫтөнә шытып сыҡҡан бойҙай. Рәттәр бик оҙон һәм тигеҙ.

Солтангәрәй Ғимазетдинов колхозсыларҙың яҙғы сәсеүҙә тырышып эшләүҙәре тураһында һөйләй. Ер тәрән һөрөлдә, культивацияланды, тырматылды. Бер генә бөртөк орлоҡ та ер өҫтөндә ҡалманы.

— Бөйөк юлбашсыбыҙға бирелгән һүҙ үтәләсәк! — тип һүҙен тамамлай председатель.

Хатта исемдәре яҙылған бөтә колхоздар, бригадалар, звенолар яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәрҙеләр. Арттә ҡалыусылар юҡ. Бына Фрунзе исемендәге колхоз. Иптәш Юдин бригадаһы 118 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 105-әр бот урожай алырға вәғәҙә итте. «Өсән-тамаҡ» колхозының иптәш Кәримов етәкселек иткән бригадаһы 140 гектар майҙанда һәр бер гектарҙан 100-әр бот урожай йыйнарға һүҙ бирҙе. Был колхоздарҙың икеһе лә яҙғы сәсеү планын срогында үтәнеләр, ә исемдәре хатта күрһәтелгән бригадалар яҙғы баҫыу эштәрен иң ҡыҫҡа срокта тамамланылар. Хәҙер улар пар һөрәләр, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә әҙерләнәләр, урожай йыйнау инвентарҙарын ремонтлайҙар.

Бына кис булды. Туймазы баҫыуҙарында йылы май кисе. Баҫыу стандарында уттар яна, тракторҙарҙың фаралары күренә. Юғары урожай беренселек өсөн көрәш дауам итә.

А. Сафонов.

Партия тормошо

Партия конференцияларында асылған етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөргә

Партияның район, ҡала һәм өлкә конференциялары партия ойошмаларының эшендәге күп кенә етешһеҙлектәрҙе асты һәм уларҙы бөтөрөүҙең конкрет юлдарын күрһәтте. Һуңғы үткән 2—3 ай ваҡыт эсендә партияның Ленин райкомы конференция ҡарарҙарын үтәү буйынса байтаҡ уңыштарға өлгәште һәм партияның эске эштәрен, партия-политик эште бер ни тиклем яҡшыртты.

Конференция ҡарарҙарын үтәү буйынса райком эш планы төҙәне һәм практик саралар билдәләне. Был саралар район партия активенең һәм тәүге партия ойошмаларының йыйылыштарында тикшерелде. Тәүге партия ойошмаларының секретарҙары өсөн семинар үткәрелде. Бында партия төҙөлөшөнән әҙерлекле доклад, лекциялар уҡылды. Райком работниктәре тәүге партия ойошмаларында йышыраҡ булып, партия эшен юлға һалыуҙа уларға практик ярҙам күрһәтә башланылар. Партия пропагандаһының идея кимәлен күтәреү, хеҙмәтсәндәр араһында агитацион-массовый эште көсәйтеү буйынса ла күп кенә эштәр башҡарылды.

Ләкин ВКП(б) райкомы һәм тәүге партия ойошмалары тарафынан эшләнә башлаған был эштәр конференция ҡарарҙары менән ҡуйылған талапты үтәп еткереүҙән бик алыҫ тора әле. Ленин районының партия ойошмалары үҙ эштәрен тамырынан уҡ үҙгәртеп ҡора алманылар. Конференция тарафынан ҡаты тәнҡитләнгән серьез етешһеҙлектәр һаман да бөтөрөлөп етмәгән.

Үҙенең һәм партияның юғары органдарының ҡарарҙарын үтәү буйынса райком бик йомшаҡ көрәшә. Был уның иң ҙур етешһеҙлеге булып тора. 25 февралдә райком бюроһы протез мастерскойында һәм район промкомбинатында коммунистарҙың политик уҡыуҙарының торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында ҡарар ҡабул итә. Ләкин өс ай ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, был партия ойошмаларында райком работниктәренән бер кеше лә булмаған һәм бюро ҡарарының үтәлеше тикшерелмәгән. Ә был ҡарар хатта тәүге партия ойошмаларының иғтибарына ла еткерелмәгән. Коммунистәр был ҡарар тураһында белмәйҙәр. Шунлыҡтан, уны үтәү тураһында уйлаған кеше лә булмаған. Бюроның быяу заводында социалистик ярышҡа партия етәкселеге тураһындағы ҡарарының үтәлеше лә тикшерелмәй ҡалдырылған.

Райкомдың эшендә тәүге партия ойошмаларының, учреждение һәм предприятиеләрҙең эшен өҫтән-өҫтән генә өйрәнеү практикаһы әле булһа бөтөрөлмәгән. Райком работниктәре эштең йөкмәткеһенә тәрән инмәйҙәр, етешһеҙлектәрҙе әсмәйҙәр һәм уларҙы бөтөрөүҙә тәүге ойошмаларға ярҙам итмәйҙәр. Шунлыҡтан, райком работниктәренең килеп китеүенән һуң партия ойошмаларының, учреждение һәм предприятиеләрҙең эшендә күҙгә күренерлек үҙгәреш булмай.

Конференцияларҙан һуң тәүге партия ойошмаларының йыйылыштары регуляр рәүештә үткәрелә башланы. Ләкин йыйылыштарҙы әҙерләүҙә һәм уларҙы үткәреүҙә элекке хаталар һаман да ҡабатланалар. Күп кенә партия ойошмаларының йыйылыштарында райком тарафынан рекомендовать ителгән мәсьәләләр генә ҡарала. Партия ойошмаларының, предприятие һәм учреждениенең үҙ тормошонан булған мәсьәләләр тикшерелмәй.

Ҡайһы бер партия ойошмаларында йыйылыштар әле булһа формаль рәүештә генә үткәрелә, партия Уставын боҙоуҙарға юл ҡуйыла. 10 мартта рейд контораһының партия ойошмаһы район партия конференцияһы йомғаҡтарын асыҡ йыйылышта тикшерә. Шул уҡ партия ойошмаһы, райком пропагандисе Хәсәновтың ҡатнашлығында партияның ҡала һәм өлкә конференцияларының йомғаҡтарын тикшереүгә арналған йыйылыш үткәрә. Был йыйылышта тәүге партия ойошмаһында учетта торған коммунистарҙың 40 проценте генә ҡатнаша. 13 мартта Главтекстильсбыт партия ойошмаһының йыйылышы, I кварталдың тәүге ике айының йомғаҡтары тураһында директорҙың отчетын тыңлап, түбәндәге ҡарарҙы ҡабул итә:

«Икенсе машинаны аяҡҡа баҫтырыу өсөн бөтә сараларҙы күрергә. Был эш өсөн яуаплы Асҡаров. Бөтә эшкә планлылыҡ индерергә, нарядтар яҙыуҙы көнлөҙгә 4 сәғәткә тиклем генә үткәрергә, нарядтарға ассортименттарҙы асыҡ күрһәтеп яҙырға. Бөтә эшкә контроль яһауҙы директор Асҡаровҡа йөкмәтергә».

Был факттар әле ҡайһы бер тәүге партия ойошмалары секретарҙарының йыйылыштарҙы әҙерләү һәм үткәреүгә яуапһыҙ ҡарауҙары, партия ойошмаларының эшселәр араһындағы бөтә массовый-политик эштәре производство программаһын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереү кәрәклеген һәм администрация эшенә партия ойошмаларының контроллек итергә тейеш булыуҙарын аңлап еткермәүҙәре тураһында һөйләйҙәр.

Партия пропагандаһы һәм агитацион-массовый эш ҡәнәғәтләнерлек булыуҙан алыҫ тора әле. Ошо көнгә тиклем 300-ҙән артыҡ коммунист партия уҡыуына йәлеп ителмәгән. Бик күп түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр сиктән тыш насар эшләйҙәр.

Һайлауҙарҙан һуң агитаторҙар һаны ныҡ кәмегән. Агитацион-массовый эштең кимәле ғәйәт дәрәжәлә түбән. Райкомдың пропаганда һәм агитация бүлеге, тәүге партия ойошмаларының секретарҙәре агитаторҙарҙы белмәйҙәр һәм уларға эштә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр.

ВКП(б)-ның Ленин райкомы был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә һәм партия эшен конференция ҡарарҙары нигеҙендә ҡайтанан ҡороуҙы тиҙ көндә тамамларға тейеш.

З. Нафиков.

Редакцияға хаттар

Нимә поликлиникала эш тәртибе юк?

15 майҙа иртәнге 9 сәғәт Октябрьск поликлиникаһына барып, врачҡа күренергә яҙылдым. Минең кеүек, медицина ярҙамына мохтаж булған байтаҡ кеше бар ине бында. Беҙгә: врач 12 сәғәттә килә, 7-се кабинетҡа киләрһегеҙ, тинеләр регистратурала.

12 сәғәттә билдәле урынға килдек. Көтәбеҙ. Кабинет асылмай. Врачҡа килеүсе ауырыуҙарҙың һаны арта тора. Улар араһында Ватан һуғышы инвалидтары, пенсионерҙар һәм хеҙмәткәрҙәр бар. Көтә торғас сәғәт ике етте. Ләкин врач һаман юҡ. Беҙ поликлиниканың баш врачы иптәш Ильинаға мөрәжәғәт итергә булдыҡ. Улай ҙа файҙа булманы. Ул беҙгә, врач ауырыған, тип ҡыҫҡа яуап бирҙе лә үҙ бүлмәһенә инеп китте.

Врач Абласова сәғәтен буш эҙләнсәк, таба алманылар. Ә приемды 18-се майға ҡалдырҙылар.

Быны беҙ алынған ун һигеҙенсе число ла етте. Киске 5 сәғәттә беҙ тағы ла приемға килдек. Врач та үҙ урынында, эш тә башланы. Инде беҙгә врачҡа эләгеү, тип өмөтләнеп көткәндә, кеҙҙән учет карточкаларығыҙ юҡ, тигән тауыш ишетелде. Ә беҙ көн эсендә беҙҙең карточкаларыбыҙ юҡ булған. Был тәртипһеҙлектәр тураһында шау-шыу башланғас, баш врач Ильина кабинеттан ишектән башын ғына күрһәтте:

— Шауламағыҙ, иртәгә килерһегеҙ! — тип ҡысҡырҙы.

Был 15 һәм 18 май көндәре беҙҙең эш көндәре менән дә айырылмайҙар. Октябрьск поликлиникаһы насар эшләй. Бында хеҙмәт дисциплинаһы, эш тәртибе бик түбән тора.

Тимер Арсланов,
Ватан һуғышы инвалиде.

—☆—

Мәктәпкә ярҙам итмәйҙәр

Өфө ҡалаһында эшсе йәштәр өсөн асылған 9-сы номерлы кискe мәктәп эшләп килә. Мәктәптә уҡыусыларҙың күпселеге, — 78 кеше агрегат заводында эшләйҙәр.

Ләкин завод етәкселәре үҙ кадрҙарын уҡытыуға — мәктәпте уҡыу-уҡытыу пособиеләре һәм утын менән тәьмин итеүгә иғтибар итмәйҙәр. 1947—48 уҡыу йылында 65 кубометр урынына, барлы 30 кубометр ғына утын бирҙеләр. Ә 1948—49 уҡыу йылы өсөн утын әҙерләү, мәктәпте ремонтлау тураһында уйлағандары ла юҡ әле.

Ҡала мәғариф бүлеге лә беҙҙең эш менән ҡыҙыҡһынмай. Бер йылда 3 директор алмаштырылды. Мәктәп бинаһының аҫҡы ҡаты әле булһа төҙөлөш тресының ФЗО мәктәбе уҡыусыларына дөйөм ятаҡ итеп файҙаланыла. Күрһәтелгән етешһеҙлектәр эшсе йәштәрҙең нормаль уҡыуҙарына ныҡ зарар итә.

Уҡытыусы Л. Андрианов.

Советтәр Союзында

Сталин өлкәһе. Ново-Краматорскиҙәге Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводының 3-сө номерлы механик цехы коллективы юғары баҫымлы котел өсөн сүкеп яһалған ике барабанды эшләп бөтөрҙө. Ул сәғәтенә 230 тонна пар бирәсәк. Ҙур барабандың ауырлығы 14 тонна, бейеклеге 13 метр.

Һүрәттә: Юғары баҫымлы котелдың ҙур барабанын ҡеүәтле токарный станокта эшкәртеүҙе токарь стахановсы И. С. Анацкий башҡара.

И. Бондаренко фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Потребителдәр кооперацияһының өсөнсө Бөтә Союз съезы тамамланды

27 майҙа потребителдәр кооперацияһының 3-сө Бөтә Союз съезы үҙенең эшен тамамланы.

Съездың иғтибар үҙәгендә ауылдарҙа һәм шулай уҡ ҡалаларҙа кооператив тауарҙары әйләнешен артабан күтәреү, ауыл хужалығы продукттары, сырье әҙерләүҙе һәм һатып алыуҙы арттырыу, сауҙаның культураһын күтәреү, потребителдәр кооперацияһының барлыҡ звеноларында финанс дисциплинаһын нығытыу мәсьәләләре булды.

Съездың делегаттары йомғаҡлау ултырышында ВКП(б) Үҙәк Комитете секретаре А. А. Кузнецов иптәштең президиумға килеүен ҡайнар тәбрикләнеләр.

Съезд 100 член һәм 20 кандидат составында Центросоюздың советен, 15 кеше составында Центросоюздың правлениеһен һәм 7 кешенән ревизия комиссияһы һайларға ҡарар итте.

Центросоюз президиумының отчеты буйынса бер тауыштан ҡарар ҡабул ителде. Съезд 1948 йылдың 1 гинуарына Центросоюздың балансын һәм потребителдәр обществолары Центросоюзының уставын раҫланы.

Съезд үҙенең ҡарарында Центросоюздың правлениеһен һәм потребителдәр кооперацияһының барлыҡ ойошмаларын ауылда тауар әйләнешен бөтә яҡлап киңәйтергә, үҙ предприятиеләрендә киң ҡулланыу тауарҙары етештереүҙе көсәйтергә, урындағы ресурстарҙы киң файҙаланырға мәжбүр итте. Съезд һәр бер ауыл лавкаһында киң ҡулланыу тауарҙары менән өҙлөкһөҙ һатыу ойоштороу, крәҫтиәндәр өсөн көндәлек тауарҙар һәм төҙөү материалдары һатыуҙы киңәйтеү кәрәклеккә айырыуса иғтибар итте.

Потребителдәр кооперацияһы ойошмаларының мөһим бурыстары ҡалаларҙа һәм эшсе поселкаларҙа һатыу ойоштороу өсөн колхозларҙан һәм крәҫтиәндәрҙән артыҡ продукттар һатып алыуҙы һәр яҡлап йәйелдереүҙән, ҡалалардағы кооператив магазиндарҙа продукттарҙың киң ассортиментен булдырыуҙан тора. Потребителдәр кооперацияһы ҡала магазиндарының эшен государство сауҙаһы магазиндары менән уңышлы ярыша алырлыҡ итеп тамырынан яҡшыртырға тейеш.

Съезд Центросоюз правлениеһенең председателе итеп И. С. Хохловты һайланы.

Центросоюздың ревизия комиссияһына 7 кеше һайланды. Уның председателе Д. С. Тимофеев иптәш.

Съезда ҡатнашыусылар ҙур күтәренкелек менән иптәш И. В. Сталинға котлау ҡабул иттеләр.

(ТАСС).

—☆—

Осоавиахимде бүлеү тураһында

Бығаса тиклем йәшәп килгән Осоавиахим ирекле обществоһы үҙ аллы өс обществоға бүленде:

а) Авиацияға булышлыҡ итеү буйынса Бөтә Союз ирекле обществоһы — (Д О С А В);

б) Армияға булышлыҡ итеү буйынса Бөтә Союз ирекле обществоһы — (Д О С А Р М);

в) Хәрби Диңгеҙ флотына булышлыҡ итеү буйынса Бөтә Союз ирекле обществоһы—(Д О С Ф Л О Т);

Ирекле обществоларҙы төҙөү буйынса ойоштороу эштәре башҡарыу өсөн һәр обществоның ойоштороу бюроһы раҫланды.

Обществоларҙың ойоштороу бюроһы председателдәре итеп:

Д О С А В-ҡа Н. П. Каманин, Д О С А Р М-ға В. И. Кузнецов һәм Д О С Ф Л О Т-ҡа А. А. Николаев иптәштәр раҫланды.

Телеграф буйынса шахмат матчы

Шахмат буйынса Мәскәү чемпионы мастер Владимир Симагин Норвегия чемпионы Олаф Барданың ике партиянан үткәреләсәк матчҡа саҡырыуын ҡабул итте. Матч телеграф буйынса үткәреләсәк. Ике партия ла бер үк ваҡытта уйналасаҡ.

Хәҙер һәр бер партияла тәүге 20 йөрөш яһалды. Симагиндең хәле бер аҙ яҡшыраҡ. Матчты еңеүсегә көмөш кубок призы бирәләсәк.

(ТАСС).

—☆—

Коньяк Себер магистрале төҙөләшөндә

ПАВЛОДАР. (ТАСС). Коньяк Себер магистраленең ҡорос юлдары Иртыштан коньяк-көнбайышҡа тараҡ, далаға ҡарай, алыҫҡа һуҙыла баралар. Эшсе поездар инде Ҡалҡаман станцияһында бушатылалар. 7 ноябргә тимер юл «Экибазуголға» тиклем етәсәк.

70 километр араға рельстар һалынды. Ике станция, өс разъезд, бер нисә һыу башняһы төҙөлдө. Өс мең квадрат метрҙан артыҡ торлаҡ майҙан эксплоатацияға тапшырылды.

Юл төҙөүселәр ғүҙәл уңыштарға өлгәштеләр. А. Мясников бригадаһы сменаға, норма буйынса 90 урынына, 200 платформа бушата. Экскаваторщиктар өс тапҡырға артыҡ балсыҡ ҡаҙыйҙар.

Күпер төҙөүселәр биш айлыҡ планды срогынан алда үтәп, 500 мең һум экономия яһанылар.

—☆—

Яңы урожай игенен ҡабул итеү өсөн элеваторҙар

СВЕРДЛОВСК. (ТАСС). Полевской «Красный металлист» заводы игенде утыҙ метр бейеклеккә күтәреү өсөн ҡулланыла торған элеваторҙарҙы эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙе.

Был машиналар «Заготзерно» пункттарында яңы игенде ҡабул итеү өсөн ҡулланыласаҡ.

* * *

Ямғыр установкалары

СССР ауыл хужалығы машиналары төҙөү Министерствоһы Свердлов исемендәге заводта (Горький өлкәһе) йәшелсә, емеш баҡсалары һәм бөртөклө ашлыҡ культураларына һыу һибеү өсөн күсмә ямғыр установкаларын массовый рәүештә эшләп сығарыуҙы ойоштороҙо. Уларҙың һәр ҡайһыһында насос, мотор, ямғыр установкаһы һәм торбалар системаһы бар. Былар бөтәһе лә йөк автомобиленә урынлаштырыла. Установка бер көн эсендә һыу бассейненән бер километр ярым алыҫлыҡтағы 3 гектар ергә һыу һибергә ала.

Яңы агрегат Горький өлкәһендәге тәжрибә участкаһында һынауҙан үтте һәм юғары баһа алды.

Йыл аҙағына тиклем илебеҙ 3 меңгә яҡын яңы ямғыр установкалары аласаҡ. (ТАСС).

Иген ҡабул итеү пункттарын тулы әҙерлеккә килтерергә

Заготзерноның иген ҡабул итеү пункттарында складтарҙы үҙ ваҡытында ремонтлау эше ҙур әһәмиәткә эйә. Ләкин Заготзерноның Башҡортостан контораһы техник базаларында был эш бик насар бара. Ағымдағы ремонт планы элеваторҙар буйынса 4,5, складтар—21 һәм сушилкалар буйынса 18 процентҡа генә үтәлде. Ә капиталь ремонт буйынса складтарҙың 60 һәм сушилкаларҙың 11,6 проценте генә әҙер. Элеваторҙарға капиталь ремонт бөтөнләй башланманы әле. Заготзерноның Исмәгил, Стәрлебаш, Табын, Өфө, Уникурла һәм Хәйбулла пункттарында ошо көнгә тиклем бер төрлө лә ремонт эштәре алып барылмай.

Заготзерно пункттары директорҙары техник базаларҙы әҙерләү эшенә яуапһыҙ ҡарайҙар, ә әҙерләүҙәр Министерствоһының район вәкилдәре, шулай уҡ район Советы башҡарма комитеттәре уларҙың эштәренә контроль яһамайҙар.

Стәрлетамаҡ элеваторында техник базаға быйыл ҙур ремонт эше үткәрелергә тейеш. Ләкин уның директоры иптәш Чернуха төҙөлөш материалдары булмауға һылтанып, ремонт эшен ойошторМай. Уның берҙән-бер эшләгән «эше»—йылғала аҡҡан бүрәнәләрҙе тотоу өсөн махсус бригада ойоштороуҙан тора. Күрәһең, ул үҙе кеүек уҡ, һал ағыҙыусыларҙа ла әһәмиәтлек кеселә, тип уйлай торғандыр.

Заготзерноның Өфө реализация базаһында (директоры иптәш Ғүмәров), шулай уҡ Иглин пунктында (директоры иптәш Рой) быйыл яңы төҙөлөштәр үткәрелергә тейеш. Ләкин был эштәр әле булһа башланмаған. Заготзерноның Башҡортостан контораһы управляющие урынбаҫары һәм баш инженеры иптәш Дудин бындағы яңы төҙөлөштәрҙең әҙләүенә төҙөлөш материалдары булмауын сәбәп итеп күрһәтергә теләй. Ә ғәмәлдә материалдар етерлек, тик уларҙы файҙаланырға ғына кәрәк ине. Мәҫәлән, БАССР Министрҙар Советы уларға 500 кубометр таш, 30 мең дана кирбес, шулай уҡ әҙбиз алырға рөхсәт итте. Бынан тыш Заготзерноның Башҡортостан контораһының үҙәк базаһында бик күп төҙөлөш материалдары бар. Шулай уҡ пункттарҙың үҙҙәрендә лә ундай материалдар аҙ түгел. Иглин пунктының үҙендә генә лә 7 вагон ағас һәм башҡа материалдар файҙаланылмай ята.

СССР Министрҙар Советы был төҙөлөштәргә төҙөү материалдары ташыу өсөн Куйбышев тимер юлынан вагондар алырға рөхсәт иткән. Ләкин был мөмкинлек шулай уҡ файҙаланылмай.

Иген һалыу пункттарында техник базаларҙы тулы әҙерлеккә килтереү — государство әһәмиәтендәге эш. Был эшкә яуапһыҙ ҡараш бынан ары урын алырға тейеш түгел. Заготзерноның Башҡортостан контораһының һәм уның урындарҙағы пункттарының етәкселәре яңы урожайҙы ҡабул итеүгә тиклем техник базаларҙы тулы әҙерлеккә килтерергә бурыслылар.

И. Шаталов.

Эшсе кадрҙарҙың техник белемен өҙлекһеҙ күтәрергә

Һуңғы йылдарҙа промышленность предприятиеләрендә техника бик ныҡ үҫте. Промышленностең айырым тармаҡтарында ул шул тиклем үҫте, хатта яңы техника менән унда эшләүсе кешеләрҙең техник белемдәре араһында ҙур айырма килеп тыуҙы. Хәҙер бик аҙ һандағы эшселәрҙең дә техник яҡтан артта ҡалыуҙары производство үҫешенә насар тәьҫир яһай. Был кадрҙарҙың техник яҡтан әҙерләү мәсьәләһен бөгөнгө көндөң үҙәк бурысы итеп ҡуя. Производствоға яңы ғына килгән йәш эшселәрҙең техник белемдәрен күтәреү генә түгел, яңы техника кимәленән артта ҡалған кадровой эшселәрҙе лә ҡайтанан техник яҡтан ҡоралландырырға кәрәк.

Республика промышленносенең айырым предприятиеләрендә яңы техниканы индереү менән бер рәттән кадрҙарҙың квалификацияларын күтәреүҙе бергә бәйләп алып барыуҙары тураһында бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин. Бына директоры иптәш Гутцайт булған металл штамплау заводы. Бында производствоның үҫә барыу кимәле техник средстволарҙы яҡшыртыу, технологик процестарға ентекле рәүештә үҙгәреш индереү, алдынғы хеҙмәт тәжрибәләрен ҡулланыу, ҡулайлаштырыу һәм механизациялау менән бер рәттән эшселәрҙең уҡыуҙары ла яҡшы ойошторолған. Заводта ябай эшсе лә, мастер ҙа, техник тә, инженер ҙа, цех начальниге лә уҡый. Эшсе станоктың ҡеүәтен оҫта файҙаланырға, металл штамплауҙа яңы режимдар эҙләргә, файҙалыраҡ эшкәртеү юлдары табырға өйрәнә, икенсе профессияларҙы үҙләштерергә тырыша. Мәҫәлән, 8 йыллыҡ нормаһын үтәүсе слесарь Сергей Соловьев, 1952 йыл планы иҫәбенә продукция етештереүсе слесарь Протопопов иптәштәр токарь, шлифовальщик, фрезеровщик һәм штамповщик булып эшләй алалар. Заводта бындай эшселәр күп. Мастерҙар, техниктәр һәм конструкторҙар үҙҙәренең техник кругозорҙарын күтәреү менән бергә, эшсе яңы технологияны, яңы эшкәртеү процесен йәки инструментте тиҙерәк үҙләштереһен, оборудованиеларҙың ҡеүәтен максималь файҙаланһын өсөн бик күп көс һалалар.

Эшселәрҙең белем кимәлдәрен күтәреү мәсьәләһенә электротехник заводы етәкселәре лә ҙур иғтибар менән ҡарайҙар. Заводтың барлыҡ цехтарында техминимум түңәрәктәре ойошторолған. Эшселәрҙең байтағы күренекле стахановсыларҙан, инструкторҙарҙан һәм мастерҙарҙан индивидуаль рәүештә алдынғы эш методтарына өйрәнәләр. Эшселәрҙең техник белем кимәлдәрен күтәреү түңәрәктәре менән инженерҙар, мастерҙар етәкселек итәләр. Икенсе специальность алырға теләүсе эшселәр өсөн махсус түңәрәктәр ойошторолған. Цех һәм бүлек етәкселәре өсөн экономик семинар эшләй. Хәҙер бригадирҙарҙан, мастерҙарҙан 40 кеше производствонан айырылмайынса, киске электротехник техникумында уҡый. Техник уҡыу буйынса инженер иптәш Кизяков инициативаһы менән юғары уҡыу йорттарына инеүгә әҙерләү курсы ойошторола. Унда 50 йәш специалист уҡыясаҡ.

Агрегат заводында кадрҙарҙың техник белемен күтәреү эше айырыуса яҡшы ҡуйылған. Бында инженер-техник работниктәр өсөн сит ил телдәрен өйрәнеү курсы эшләй. 8 техник Урал индустриаль институтының завод эргәһендә асылған филиалының беренсе курсында уҡый. Цех һәм бүлек командирҙары өсөн экономик семинар, керамика производствоһы мәктәбе эшләй. Мастерҙар, нормировщиктар, электриктар һәм төрлө профессия эшселәре өсөн махсус курстар бар. Заводтың төп цехтарында меңгә яҡын эшсе техминимум тапшырҙы.

Бөтә коллективтең ныҡышмалы уҡыуы заводты ҙур өҙәклектән сығарып, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшселәрҙең алғы сафына тинләшергә мөмкинлек бирҙе. Завод 30 апрелгә биш айлыҡ планды үтәүгә өлгәште. Стахановсы эшселәрҙең һаны артты. Хәҙер бында 17 эшсе үҙҙәренең биш йыллыҡтарын үтәнеләр.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, кадрҙарҙың техник белемен күтәреү эше бөтә урында ла былай яҡшы тора, тип булмай. Айырым предприятиеләрҙә хужалыҡ етәкселәре кадрҙарҙы техник яҡтан әҙерләү мәсьәләһенә иғтибар биреп еткермәйҙәр.

Миҫал өсөн электрооборудование заводын ғына алайыҡ. Бында производствоның күп кенә процестары бик ҡатмарлы, улар инженерҙарҙың, техниктарҙың һәм мастерҙарҙың генә түгел, ябай эшселәрҙең дә юғары техник белемле булыуҙарын талап итә. Ләкин заводта специалистарҙың техник белем кимәлдәре менән эшселәрҙе квалификацион әҙерләү араһында ҙур өҙәклек йәшәй.

Бында специалистарҙы уҡыртыу һәм ғилми эшкә ылыҡтырыу, улар араһында техник белемде, яңы техник нигеҙҙәрен пропагандалау эше бер ни тиклем алып барыла. Ләкин эшселәр һәм мастерҙар араһында техник белемде пропагандалау өлкәһендә бер нәмә лә эшләнмәй. Техник уҡыуҙар буйынса инженер иптәш Н. Н. Сопльников та был мөһим эш менән серьез шөғөлләнмәй. Техминимум түңәрәктәре формаль рәүештә генә ойошторолғандар. Стахановсы мәктәптәр юҡ. Эшселәрҙең, мастерҙарҙың техник яҡтан артта ҡалыуҙары һөҙөмтәһендә заводта технологик процестарҙы боҙоу факттары күп урын алған.

Республикабыҙҙың промышленность предприятиеләре коллективтәре биш йыллыҡты срогынан бер йыл алда үтәргә йөкләмә алдылар. Был йөкләмәне уңышлы үтәү өсөн производство кимәлен артабан үҫтерергә, яңы техниканы һәм технологик процестарҙы ҡыйыуыраҡ индерергә кәрәк.

С. Мәүлютов.

Дәүләкән механизаторҙарының гүзәл инициативаһы



Дәүләкән МТС-ында өс трактор бригадаһы быйылғы сезондан башлап хужалыҡ иҫәбе менән эшләүгә күсте.
Һүрәттә (һулдан уңға): хужалыҡ иҫәбе менән эшләүсе трактор бригадаларының бригадирҙәре З. Рогачев, Социалистик Хеҙмәт Геройы Т. Алехин һәм В. Желобецкий иптәштәр.

Алдынғы трактор бригадалары хужалыҡ иҫәбенә күстеләр

Дәүләкән МТС-ы коллективы инде бер нисә йыл машина-трактор паркын файҙаланыуҙа, юғары урожай үҫтереүҙә ҙур ғына уңыштар яулап алып килә. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ уларҙың хеҙмәтен юғары баһаланы. МТС директоры Павлов, өлкән агроном Несторов, өлкән механик Тарасенко, трактор бригадаһы бригадиры Алехин иптәштәргә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде һәм бик күп алдынғы механизаторҙар орденлдәр, медалдәр менән наградландылар.

МТС-тың быйылғы яҙғы сәсеү осорондағы эше лә бик матур. Тракторҙарҙың яҙғы эш планы арттырылып үтәлде. 25 майға 12 мең 586 гектар урынына, 13 мең 779 гектар ер эшкәртелде.

Алдынғы бригадаларҙың эш күрһәткестәре айырыуса юғары. Иптәш Алехин бригадаһы яҙғы сәсеү планын 15 эш көнөндә үтәне. Шартлы һәр бер тракторға был осорҙа 200 гектар ер эшкәртелде, 200 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды. Желобецкий, Рогачев иптәштәрҙең бригадаларында ла сәсеү уңышлы үтте. Беренсеһендә — 205 килограмм, икенсеһендә — 377 килограмм яғыулыҡҡа экономия яһалды.

Алдынғы бригадалар был уңыштарға нисек өлгәштеләр? Улар бөтәһе лә быйылғы эш сезонынан башлап хужалыҡ иҫәбе менән эшләйҙәр. Трактор бригадаһының рентабелле эшләүе өсөн бында ныҡышмалы көрәш бара.

— Беҙҙең бригада, — ти Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехин, — үткән йыл тәгәрмәсле ике трактор менән 2 мең гектар ер эшкәртте, 2 мең 511 килограмм яғыулыҡҡа һәм ремонт эшендә 12 мең һум аҡсаға экономия яһаны. Беҙҙең участкаҙың һәр гектарын эшкәртеү, башҡа бригадаларҙыҡына ҡарағанда, 6 һумға кәмерәккә төштө. Был — сик түгел, тағы ла яҡшыраҡ эшләгәндә, экономия өсөн көрәште ойоштороғанда, рентабеллерәк эшләргә мөмкин.

Желобецкий һәм Рогачев иптәштәр ҙә шундай уҡ фекерҙәләр. Улар бөтәһе бергә үҙҙәренең бригадаларын хужалыҡ иҫәбенә күсерергә һорап, МТС директорына мөрәжәғәт иттеләр. Иптәш Павлов алдынғыларҙың яҡшы инициативаһын хуплап ҡаршы алды һәм приказ менән 3 бригаданы хужалыҡ иҫәбенә күсерҙе.

Хәҙер бригадаларҙа хеҙмәт дисциплинаһы тағы ла яҡшырҙы, юғары урожай өсөн көрәштә яуаплылыҡ көсәйҙе, һәр бер тин аҡса һәм һәр бер килограмм яғыулыҡ бик ҡәҙерле.

Бына иптәш Алехин бригадаһы. Бында смена нормаһын үтәмәгән бер генә тракторист та юҡ. Һәр бер минут ваҡыт эштә тулыһынса файҙаланыла. Тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә эшләтеү өсөн бөтә саралар күрелә. Заправка альвеер насосы менән бураҙналарҙа үткәрелә. Әгәр ҙә үҙған йыл күп кенә деталдәр МТС мастерскойында, йәки колхоз тимерселәре тарафынан эшләнһә, хәҙер уларҙың күбеһен трактористар үҙҙәре эшләйҙәр. Деталдарҙың сифаты ла яҡшыра төштө. Машиналарға техник тәрбиә үҙ ваҡытында, регуляр рәүештә үткәрелә. Трактористарға күптән түгел генә яңынан аттестация үткәрелде. Мосяков, Стручков, Титов иптәштәр — бөтәһе лә беренсе категориялы трактористар.

Хужалыҡ иҫәбенә күскән башҡа бригадаларҙа ла шулай уҡ эшләйҙәр. Хеҙмәт етештереүсәнлеге лә, юғары урожай өсөн көрәштә яуаплылыҡ та күтәрелде.

Хәҙер МТС-та урожай йыйнауға әҙерлек эштәре ҡыҙыу бара. 31 комбайндың 20-һенә ремонт тамамланды. «Коммунар» һәм «Сталинец» комбайндары менән урожай йыйнау планын икеләтә арттырып үтәү өсөн коллектив йөкләмә алды. МТС-ҡа оҙаҡламай үҙе йөрөй торған ес комбайн киләсәк. Улар хужалыҡ иҫәбе менән эшләгән бригадаларға бирелә.

З. Ишбулатов.

Ауылдарға машиналар

Башҡортостан районларына ауыл хужалығы машиналары килеү дауам итә. «Сельхозснабтың» Туймазы бүлексәһе генә май айында 20 сәскес машина, 60 молотилка һәм 48 башҡа төр машиналар алды. Ул машиналар бөтәһе лә колхоздарға ебәрелде.

М. Тәжи

Еңелгән төн

Алһыулап офоҡ ситтәрен
Ҡыҙылып таң атты,
Аҡ ҡайын һәм тирәктәрҙе
Талғын ел ҡаҡты.
Иылға, күл өҫтәрен сайҡап
Ҡояштың нуры,
Алмаз таш һымаҡ йылҡылдап
Тауҙарға ҡунды.
Көн башланды, баҫыуҙарҙы
Шау-шыуға күмеп,
Таборҙағы усаҡтарҙың
Уттары һүнде.
Һүнмәне тик моторҙарҙың
Уттары һаман,
Һулышынан НАТИ-ҙәрҙең
Гөрләне ялан.
Кисәге һуҡмағы буйлап
Ҡояш тәгәрәй,
Һәм буҙ турғай бер урында
Сырлап әйләнә.
Һәм егет әйләнде ерҙе
Уң-һулға ярып,
Тик ул кисә үткән эҙен
Ҡабатламаны.
Ҡисә кис ул тоймағайны
Ҡояш батҡанын,
Тау артынан, томан ярып,
Ай ҡалҡҡанын.
Күҙ һалмаңы егет айға
Йоҡоһоҙ төндә,
Күҙ алдында, тулҡын һымаҡ
Сайҡала ерҙәр.
Айҙы, юлдашҡандай, болот
Ерҙән йәшерҙе,
Фара нуры, юлдаш булып,
Төнгә сәселде.
Төн йөрәкә, бөркөт төҫлө,
Ҡаҡатың кереп,
Егет һаман алға китте,
Шул төндө еңеп.

Яңы рубежға ынтылған
Һалдат шикелле;
Үтте үр, янтаҫ, соҡорҙан,
Ерҙәр һиңкене.
Тойһа ла ул аңғының
Уттай ҡыҙғанын,
Окотто иҫкә яраның
Сатпап һыҙлауын.
Педалено уҡлы-һуңлы
Алмашлап баҫты,
Ә НАТИ-ҙең ҡыҙыулығы
Артҡандан-артты.
Тиҙләтергә теләгәндәй
Таңдың атыуын,
Ул моторға бирҙе буғай
Йөрәк ялҡынын.
Таң ҡыйылып, күктә болот
Туҙғып аҡҡанда,
Ай батып, Сулпан йондоҙо
Баҙлап ҡалҡҡанда, —
Ҡараңы әйләнеп егет
Үткән эҙҙәрен,
Тик ул төнөн үткән ерҙең
Сиген күрмәне.
Ер буйлатып, һыбай атта,
Бригадир елде,
Ике тауҙы тирә яҡлап
Әйләнеп килде.
Һәм уң ҡулын алға һелтәп
Ергә һикерҙе,
Разведкадан ҡайтып төшкән
Һалдат шикелле,
Тәбрик итеп ҡулын ҡыҫты
Егеттең килеп:
— Сменаға ике норма
Һөрөлгән, — тине.
Һәм егеттең үткән юлы
Данға күмелде,
НАТИ-ена шул көп уның
Байраҡ эләнде.

Комбайндарҙы Бәжәр МТС-ы көйөк ремонтларға

Бәжәр МТС-ы механизаторҙары машина-трактор паркын яҙғы сәсеүгә һәм комбайндарҙы урожай йыйнауға өлгәлә әҙерләү буйынса йөкләмәләр алып, республикабыҙҙың бөтә МТС работниктарына мөрәжәғәт иткәйнеләр. Бәжәр МТС-ы коллективы үҙ йөкләмәһен тракторҙар ремонтлауҙа намыҫ менән үтәне. Берҙәм коллектив хәҙер комбайндар паркын да урожай йыйнауға уңышлы әҙерләй. Бында хәҙер комбайндарҙың 83 проценты бөгөндән баҫыуға сығырға әҙер.

МТС-та бөтә комбайнерҙар эшкә ылыҡтырылғандар. Эштә бригадно-узловой метод ҡулланыла. Мастерскойҙа эш көнө тығыҙландырылған, көндәлек нормалар систематик рәүештә үтәлә. Һәр бер ремонтсы социалистик ярышта алған йөкләмәне үтәү өсөн бөтә көсөн биреп эшләй.

Урожай йыйнауға үҙ ваҡытында әҙерләнеүҙең әһәмиәтен аңлаған башҡа алдынғы машина-трактор станциялары ла комбайндар ремонтлауҙа яҡшы эшләйҙәр. Мәҫәлән, Октябрьск МТС-ы комбайндар ремонтының йыллыҡ планын 63, Янаул, Шаран МТС-тары — 45, Кушнаренко, Михайловка МТС-тары 41 процентҡа үтәнеләр. Улар комбайндарҙы әҙерләү эшен тракторҙар ремонты менән бер уҡ ваҡытта алып барҙылар. Шулай эшләргә бөтә урындарҙа ла мөмкинлектәр бар ине, ләкин улар файҙаланылманылар һәм хәҙер ҙә файҙаланылмайҙар.

Күп кенә МТС етәкселәре урожай йыйнауға әҙерлек эшен яҙғы сәсеү тамамланғас башларбыҙ, тип килделәр. Үҙған йыл да шундай хаталарға юл ҡуйылыу арҡаһында урожай йыйнау һуҙылатылды һәм бик күп игенде юғалтыуҙар булды. Благовар МТС-ының етәкселәре быйыл да был эшкә әһәмиәт бирмәй, үҙған йылғы хаталарҙы ҡабатлауға алып баралар. Бында комбайндарға ремонт март айында уҡ башланғайны, өс ай ваҡыт эсендә ни бары ике комбайн ремонтланған. Былдай темп менән эшләгәндә, МТС етәкселәре өсөн тағы ла 19 комбайнды ремонтлауға бер нисә айҙар талап ителә тиган һүҙ. Ремонт графиген үтәп барыу өсөн был МТС-та тулы мөмкинлектәр бар. Квалификациялы кадрҙар етерлек, мастерской яҡшы йыһазландырылған, станоктар һәм башҡа техник средстволар яҡшы. Ләкин ремонт эшендә ни бары 8 комбайнер һәм 5 комбайнер ярҙамсыһы ғына эшләй.

Күпселек МТС етәкселәренең был эшкә яуапһыҙ ҡарауҙары һөҙөмтәһендә республикала комбайндар ремонтлау планы 20 майға ни бары 14,2 процентҡа генә үтәлде.

Республикабыҙҙағы ремонт заводтарының моторҙар ремонтлау планын өҙөүҙәре лә комбайндар ремонтлауға ҙур тоткарлыҡ яһай. Өфө ремонт заводы 150 комбайн моторы ремонтларға тейеш. Бөгөнгә көндә ни бары 10 мотор ремонтланған.

Урожай йыйнауға әҙерлектә артабан һуҙыуға юл ҡуйылырға тейеш түгел. МТС-тар ремонт эшенә бөтә комбайнерҙарҙы ылыҡтырырға һәм улар араһында социалистик ярышты киң йәйелдереп, ремонт графиген әҙмә-эҙ үтәп барыуҙы тәьмин итергә тейештәр.

Яңы китаптар

«Советский писатель» издательствоһы Анна Караваеваның «Разбег» тигән романын баҫып сығарҙы. Роман 437 биттән тора, хаҡы 13 һум.

Романда ваҡиға 1941—42 йылдарҙа, беҙҙең промышленносебеҙ хәрби ыңлаҡа ҡоролған осорҙа бара. Лесогорск заводында төп эшселәр массаһы — карттарҙан, ҡатын-ҡыҙҙарҙан һәм «ремесленниктәрҙән» тора. Карт большевик, заводтың директоры Пермяков, ВКП(б) Үҙәк Комитеты парторгы Пластуновтар, дошман Волга ярына ынтылашҡан саҡта, эшселәрҙе бөйөк хеҙмәт батырлығына күтәрәләр.

Тәҙөү-ижад хеҙмәте алдынғы кешеләрҙе тыуҙыра. Бер уҡ ваҡыт кешеләрҙе һуғыш килтергән үҙ ҡайғыларын кисерергә, күптәргә бөтөнләй яңы булған эштәргә өйрәнергә һәм иҫке производство алымдарын емерергә кәрәк ине.

Анна Караваева Лесогорск эшселәренең нисек үҙ һүҙҙәрендә торол, илгә ҡеүәтле танк бирәүҙәрен, кешеләрҙең үҫеүен һәм тарихи эпопея ваҡытында ысын геройҙарға әйләнеүен күрһәтә.

* * *

Әхмәт Джалиль. Шиғырҙар. Азербайжансанан руссаға тәржемә, 106 бит, хаҡы 5 һум, 1947 йыл.

Азербайжан йәш шағиренең күп әҫәрҙәре бөйөк Ватан һуғышына арналған.

«Ватан өсөн йән биреүҙән
Юҡ бөйөк хөрмәт!» —

ошо фекер йыйынтыктағы бөтә шиғырҙар өсөн уртаҡ. «Туған гәскәрҙәргә», «Уйланыуҙар», «Батыр бул», «Ыырҙар» һәм башҡа күп шиғырҙар өсөн батырлыҡҡа саҡырыу, Ватанға ҡайнар мәхәббәт, еңеүгә ныҡ ышаныу, йылы тойғолар характерле.

Фронт менән тыл берҙәмлеге нигеҙендә тыуасаҡ еңеү автор алдыкда ныҡ беренсе йылдың ауыр көҙөндә уҡ һүрәтләнә.

Шиғырҙарҙың байтаҡ өлөшө дошманды еңеүгә, илде азаткә баҫтырыу осороңдағы батыр хеҙмәткә арналған.

Азаҡҡы шиғырҙың һуңғы юлдары:

«Кешеләрҙең һәр уйында,
Һәр һүҙендә, йөрәк түрендә,
Бөйөк Сталинга булған
Сикһеҙ һөйөү күренә!»,

тип бөтә.

* * *

Стефан Зорьян. «Алма баҡсаһы». Повесть һәм хикәйәләр. Әрмәнсәнән руссаға тәржемә, 263 бит, хаҡы 8 сум, 1948 йыл.

Хәҙерге заман әрмән яҙыусылары араһында С. Зорьян күренекле урын тота. Зорьян новеллаларында авторҙың ҡеүәтселеге, оҫта кеше белеүе, геройҙарҙың характерен оҫта итеп асыуы күҙгә салынып тора. Элекке новеллаларынан — «Шәкәр һауыты», «Сиркәү ҡағыусы Антон» халыҡтарҙы гәрипләндереүсе капиталистик мөнәсәбәттәр осорон һүрәтләй.

Күп кенә әҫәрҙәр беҙҙең осорҙо сағылдырыуға арналған. «Аҡ ҡала» повесендә автор семья һәм мораль мәсьәләләренә ҡағыла. Йәш коммунист Тигран яңы ҡала төҙөү проекты менән мауыҡҡан. Уның был мауыуын ҡатыны Анна оҡшатмай. Тигран саҡ семьяһынан айырылмай ҡала. Байтаҡ икеләнеүҙәрҙән һуң Анна иренә кире ҡайта, хеҙмәт юлына баҫа һәм был уны рухани бушлыҡтан ҡотҡара...

«Алма баҡсаһы» йыйынтығы уҡыусыларҙы Стефан Зорьяндың күп тармаҡлы ижадының бер өлөшө менән генә таныштыра әле. Уның Европа телдәренә тәржемә ителгән күп әҫәрҙәре бар.

* * *

Ховард Фаст. «Һуңғы сик». Инглизсәнән руссаға тәржемә, 352 бит, хаҡы 11 һум 75 тин, 1948 йыл.

Американың прогрессив йәш яҙыусыһы Ховард Фаст үҙенең «Еңелмәүселәр», «Гражданин Том Пейн», «Азатлыҡ юлы» һәм башҡа тарихи романдары менән билдәле. Романдарҙа Төньяҡ Америкала йәшәүсе төп халыҡтарҙың «цивилизациялы» колонизаторҙары тарафынан тупаҫ кол ителеүҙәре картиналары дөрөҫ сағылдырылғандар.

«Һуңғы сик» романы Төньяҡ Американың бер индус ырыуы тормошонан булған ваҡиғаны һүрәтләй.

Тупаҫ, бик түбән чиновник Майк шайендәр ырыуын өмөт өҙәп төньякҡа китергә мәжбүр итеүгә тиклем килтереп еткерә. Батыр индустар, маҡсаттарына ирешеү өсөн, үҙҙәрен урап алған Американың регуляр армияһына бер нисә тапҡыр еңелеү килтерәләр. Бирелергә ҡушыл яһалған бөтә тәкдимдәргә улар: «Ҡол булғансы, үлербеҙ!», тип яуап ҡайтаралар.

Ошо хикәйә фонында Америкаһың XIX быуат политик деятелдәренең фигуралары күҙ алдынан үтеп киталәр.

Роман совет кешеләре тарафынан ҡыҙыҡһыныу менән уҡыласаҡ һәм уларға Америка «демократияһының» мәғәнәһенә төшөнөүгә ярҙам итәсәк.

Яҡшы баҫылған китаптар сығарырға

Киң халыҡ массаһын идея-политик яҡтан тәрбиәләүҙә большевистик матбуғаттың тотҡан урыны бик ҙур. Беҙҙең партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ совет матбуғатының артабан өлгәшеүҙәре өсөн күп хәстәрлектәр күрә. ЕКП(б) Үҙәк Комитеты эргәһендәге пропаганда һәм агитация бүлеге 1948 йылдың башынан бирле издательство етәкселәренең һәм работниктарының бер нисә кәңәшмәһен үткәрҙе. Был кәңәшмәләрҙә китаптарҙың сифатын, техник һәм полиграфик оформлениеләрен яҡшыртыу мәсьәләләре лә ныҡ ҡуйылдылар.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты «Китаптарҙы полиграфик оформить итеү тураһында» 1945 йылдың июнендә айырым ҡарар ҡабул иткәйне. Ул ҡарарҙа издательстволарҙың китаптар һәм журналдар сығарыуҙа полиграфик һәм художество яғынан оформить итеүҙә яһаған күп кенә етешһеҙлектәре күрһәтелә. Ләкин был етешһеҙлектәр беҙҙә бик аҡырын бөтөрөләләр.

Башгосиздат тарафынан сығарыла торған китаптар һәм брошюраларҙың техник һәм полиграфик оформлениеләре һаман да түбән сифатлы булып ҡалалар. Бының төп сәбәбе, китаптарҙы техник һәм полиграфик яҡтан оформить итеүҙә төрлө ижади яңылыҡтар, уйлап сығарыуҙарҙы ҡулланмауҙа булһа, икенсенән, литография һәм цинкографияларҙың насар эшләүҙәрендә. Уҡыу китаптары, айырыуса балалар өсөн сығарылған художество әҙәбиәте һүрәттәргә бай булырға тейеш. Ләкин китаптарга кәрәк клишеләрҙе эшләтеү беҙҙә бик ауырлаштырылған: полиграф управлениеһенең цинкографияһында Башгосиздат иҫәпкә алынмаған «үгәй бала» кеүек кенә. Башгосиздат өсөн материалдар юҡ. Кәрәкле кислоталар ҙа булмай. Шул арҡала Госиздат күп китаптарҙы һуңлатып, полиграфик яҡтан насар эшләп сығарырға мәжбүр була.

Башгосиздат тарафынан һуңғы йылдарҙа сығарылған ниндәй генә китапты йәки брошюраны алып ҡараһаң да, барыһы ла полиграфик яҡтан насар эшләнгәндәр. Уларҙың тышҡы төҫө уҡ кешене тартмай, ситтәре ҡыйыҡ киҫелгәндәр, һүрәттәре насар, тоноҡ баҫылғандар. Күптән түгел баҫылып сыҡҡан А. С. Пушкиндең «Капитан ҡыҙы» повесен, Н. В. Гоголдең «Сарочин йәрминкәһе» һәм урта мәктәптең 9 кластары өсөн әҙәбиәттән хрестоматия китаптарын ғына алып ҡарау ҙа быны асыҡ дәлилләй.

Полиграфик яҡтан насар эшләнгән продукция сығарыуға кем яуаплы һуң?

Иң элек издательство һәм полиграфия етәкселәре яуаплы булһалар, икенсенән, шундай продукцияны алып массаға таратыуҙа — китап менән сауҙа итеү ойошмалары ла яуаплы. Шуның өсөн типография, Башгосиздаттан яҡшы оригиналдар, клишеләр талап иткән кеүек, Госиздат ҡала типографияһынан яҡшы сифатта баҫылған, тышланған китаптар талап итергә бик ваҡыт инде.

«Октябрь Натискаһы» типографияһы етәкселәре китап һәм брошюраларҙың полиграфик эшләнеше насар булыуы менән ошо көнгә тиклем килешеп килаләр.

Планды тулы һәм сифатлы үтәү өсөн бөтә Союз буйынса намыҫлы хеҙмәт, социалистик ярыш йәйелдерелгән саҡта, республикабыҙ типографияһының түбән сифатлы күрһәткестәр биреүе юл ҡуйыла торған хәл түгел.

Р. Рәхимов.

Колхозға яңы трактор килгәс

Ҡеүәтле яңы «С—80» тракторы янына орлоҡ тейәгән арба килеп туҡтаны. Игенселәр һүҙҙе менән әйтһәк, күгәрсен күҙе кеүек, эре, таҙа ҡыҙыл бойҙай сәскестәргә һалына.

— Бына ошо инде элита, — тине учетчик эре бойҙай орлоҡтарын күрһәтеп. Арананы береү:

— Былай булғас, колхозға етерлек бойҙай үҫә инде, — ти.

Учетчиктең йөҙөнә ризаһыҙлыҡ сыға. Ул:

— Юҡ инде, колхозға ғына етерлек бойҙай үҫтереү эш түгел. Беҙҙең колхоз орлоҡсолоҡ колхозы, быйыл, бөтә районға етерлек орлоҡ үҫтерергә кәрәк. — Учетчик бураҙнала орлоҡ һалынып бөтөүҙе көтөп тороусы тракторға күрһәтте, — уны бында күргәҙмәгә ҡуйыр өсөн генә ебәрмәгәндәр.

Был һүҙҙәрҙе ҡеүәтләгәндәй сәскестең ауыр ҡапҡасы шартлап ябылды. Трактор гудок биреп, үҙенә тағылған һабандарҙы, тырмаларҙы һәм сәскес машиналарын бер юлы һөйрәп ҡуҙғалып та китте.

— Бына нисек икән ул техника...
— Бер алыны—уң аҙым!

Көслө трактор, ғәжәпләнеүҙәргә һис тә иҫе китмәгәндәй, күкрәк киреп алға барыуҙы дауам итә. Тик ара-тирә сиҙәм ерҙәр тура килгәндә, һабанлар тағылған ҙур валиктар генә шытырҙап ҡуялар. Трактор артында, һөрөп эшкәртелгән ер яҫтыҡ шикелле түшәлеп, күпереп ҡала...

Был Молотов исемендәге орлоҡсолоҡ колхозының баҫыуы ине. Колхозды Мәләүез МТС-ының иптәш Абрамов етәкселек иткән алдынғы трактор бригадаһы хеҙмәтләндерә һәм бындағы «С—80» тракторын бригаданың һыналған трактористәре Иван Руднев һәм Иван Поляков иптәштәр йөрөтәләр.

Трактор яңы ине, шуға күрә ул тәүге ике—өс көн эсендә 25—30 процент нагрузка менән генә эшләне. Уның руленә башлап ултырыусы Руднев һәм Поляков иптәштәр ҡатмарлы машина үҙҙәренә буйһонмаҫ кеүек һиҙгәйнеләр. Ләкин улай булып сыҡманы. Яңы трактор күп ҡатмарлы, ә шулай ҙа аныҡ эшләүсе, капризһыҙ машина. Уның дөйөм ҡеүәте 80 ат көсө тәшкил итә. Тимәк ул, башҡа тракторҙарға сағыштырғанда, 2—3 тапҡыр көслөрәк. Ә шулай булыуға ҡарамаҫтан, үҙенә яғыулыҡ бик аҙ китә. Тик эш шунда: машина бөтә частарҙың үҙ урынында булыуын ярата һәм тәрбиәләп тотоуҙы талап итә. Яңы машинаға һыу ҙа бик аҙ кәрәк. Ләкин ул да бик таҙа булырға тейеш.

Трактор хәҙер тулы нагрузка менән эшләй. Тәүге көндәрҙә ул биш корпуслы бер генә һабан тартһа, хәҙер өс һабан һәм бер нисә пар тырма тага. Трактор көнөнә 32—35 гектар ер һөрә һәм тырмата. Был норма менән билдәләнгәндән 25—30 процентҡа күберәк.

Колхозға «С—80» тракторы килеүе колхозсыларҙа яңы көс һәм дәрт тыуҙырҙы. Әйтерһең дә ул ҡаты сиҙәмдәрҙе генә күтәрмәй, ә кешеләр йөрәгендәге бөтә дәрттәрҙе лә уята.

— Хөкүмәтебеҙ беҙҙең колхозға ошондай ғәйрәтле трактор биргәндә, нисек етте улай ғына эшләп тороп булмаҫ инде...

Баҫыуға сыҡҡас сәсеү машинаһында эшләүсе ҡарт колхозсы Николай Хромиловтың беренсе һүҙе бына ошо булды.

Звеноводтар бер-береһенә ҡараштылар.

— Беҙҙең звено быйыл бойҙайҙың гектарынан 20-шәр центнер урожай аласаҡ, — тине беренсе звеноның звеноводы йәш, уңған ҡыҙ Надя Шестова.

— Беҙ ҙә ҡалышмабыҙ!..
— Беҙ ҙә...

— Кем ҡалышһа, шуны бына яңы тракторға тағып ебәрербеҙ, ул һөйрәр... — тип шаяртты звеноводтарҙы, ҡарт колхозсы иптәш Хромилов.

Колхозда 13 звено. Сәсеүгә төшөү менән баҫыу становында ҡуна ятып эш башланды. Беренсе көндән үк звенолар яҡшы эшләнеләр. Индивидуаль сдельщина звенолорҙа киң ҡулланыла. Юғары урожай алыуға өлгәшеү өсөн колхозсылар нәмә генә эшләмәйҙәр? Баҫыуҙарға бер нисә мең йөк тиреҫ сығарылды, ҡар ҡыйылды. Баҫыу араларында урман полосаларына 20 мең төп ағас ултыртылды. Трактор һөрә торған участкаға беркетелгән звенолар трактористәргә булышалар. Төндә трактор артынан йөрөп тырмаларҙы таҙарталар. Ерҙең яҡшы сифатлы итеп эшкәртелеүенә күҙәтселек итәләр.

— Һабанда һайрашҡан яҡшы, — тиҙәр улар.

Тырышып эшләүҙең һөҙөмтәләре лә матур. Колхоз яҙғы сәсеүҙә алдынғы сафта бара. Быйыл бында бойҙай ғына 600 гектар сәселде. Был үҙған йыл сәселгәндән өс тапҡыр күберәк.

Берҙәм эшләүсе колхозсылар янына яңы газета алып агитатор килә. Ул баҫыу эшсәндәрен халыҡ-ара хәл менән таныштыра, баҫыуҙа үткәрелгән эштәргә лә күҙәтеү яһай.

— Район колхоздарының өмөтө беҙҙә инде, — ти агитатор.

Колхозсыларҙа рух күтәренкелеге айырыуса көслө. Һәр саҡыт үҙенең тапҡырлығы һәм дөрөҫ һөйләүе менән танылған тәжрибәле колхозсы иптәш Хромилов һүҙ алды. Ул:

— Колхозыбыҙҙа «С—80» кеүек ҡеүәтле трактор ҙа булғас, быйыл, үҙегеҙгә билдәле булғанса, звенолар ҙа яҡшы итеп ойошторолдо бит инде. Мин уйлайым, бөтә районға ғына түгел, бөтә губернияға етерлек орлоҡ үҫтерербеҙ!—ти.

— Дөрөҫ, ул беҙҙең фекерҙе һөйләй, — тип, башҡа колхозсылар уны ҡеүәтләйҙәр.

Б. Сафин.
Мәләүез районы.

Мәктәп янында баҡса

Өфө ҡалаһы 15-се номерле мәктәп тирәһен йәшелләндереүҙә уҡыусылар, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр актив ҡатнашалар.

Мәктәп эргәһендәге быға тиклем буш ятҡан майҙанда алмағас, ҡурай еләге, ҡарағат һәм башҡа емеш-еләк ҡыуаҡтары ултыртылды. Виктория еләге, сейә ҡыуаҡтары өсөн ер эшкәртелде.

Ә. Антов.

Халыҡ-ара күзәтеү

КӨНБАЙЫШ ГЕРМАНИЯ ТУРАҺЫНДА АЛТЫ ИЛДЕҢ ЛОНДОНДАҒЫ ҺӨЙЛӘШЕҮЕ

Лондонда Көнбайыш Германия мәсьәләһе буйынса АҠШ, Англия, Франция һәм Бенилюкс (Бельгия, Нидерландтар, Люксембург) илдәре вәкилдәренең һөйләшеүҙәре бара. Февраль айында уҡ башланған был һөйләшеүҙәр Германия мәсьәләһе буйынса элек ҡылешелгән ҡарарҙарҙы тупаҫ рәүештә боҙоу булып торалар һәм законлы көскә һәм халыҡ-ара авторитетҡа эйә була алмаясаҡтар.

Март айында ошо һөйләшеүҙәр нигеҙендә Бизония «хөкүмәте» — административ совет тип атала торған нәмә төҙөлгәйне. Шунан һуң ес көнбайыш зона өсөн берләшкән банк төҙөлдө. Лондондағы быйылғы кәңәшмә, уның инициаторҙарының фекеренсә, Рур өҫтөнән контроль итеү эшен АҠШ-ҡа тапшырыу, Көнбайыш Германияның сиктәрен, политик структураһын тикшереү, йәғни, асылда, Германияны бүлгеләүҙе тамамлау һәм уның көнбайыш өлөшөндә Америка монополияларының хакимлеген нығытыу өсөн саҡырылған.

Сит ил матбуғатында иғлан ителгән ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарап хөкөм иткәндә, АҠШ вәкилдәре Көнбайыш Германия өсөн хөкүмәт төҙөүҙе һәм Рурҙы тулыһынса АҠШ контроленә күсереүҙе ныҡышмалы рәүештә талап итәләр.

Франция делегацияһы Рурҙы АҠШ-ҡа тапшырыу менән килешмәй һәм Көнбайыш Германия государствоһын төҙөүгә ҡаршы килә, һөйләшеүҙәр шуға күрә һуҙыла.

Тыныслыҡ һәм Францияның именлеге өсөн Рур проблемаһының әһәмиәте Францияла бүтәнсә, шулай уҡ унан тышта ла бик яҡшы билдәле. Рур Франция тарихендә ес тапҡыр Германия агрессияһының хәрби-экономик базаһы булып хеҙмәт итте. Көнбайыш Германия государствоһын—реакцион режимле һәм киләсәктә реваншистик агрессив пландары һәм АҠШ-ҡа буйһонған государствоны төҙөргә ынтылыш Францияның именлеге өсөн ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра. Ләкин был хәҙер Францияның хакимлеҡ итеүсе ҡүүгаларына һәм уның тышҡы политикаһының етәкселәренә, Германия проблемаһын тикшергән ваҡытта, АҠШ Госдепартаменте алдында систематик рәүештә сигенергә ҡомасауламаны.

Франция делегацияһы инструкциялар алыу өсөн Парижға ҡайтарылды. Англия һәм Америка матбуғатында Францияның «ол ҡуймаусан» һәм «килешмәүсән» позицияһы арҡаһында «алты ил конференцияһының» уңышһыҙлыҡҡа осрау ихтималы барлығы тураһында хәбәрҙәр баҫылып сыҡты. Америка матбуғаты, әгәр ҙә Франция Германия мәсьәләһендә АҠШ алдында тәҙләнмәһә, уға «Маршалл планы» буйынса ярҙам итеүҙе туҡтатыу менән асыҡтанасыҡ ҡурҡыта.

Кәңәшмәнең шыма ғына бармауында шик юҡ. Сепаратный һөйләшеүҙәрҙең ес ай буйынса һуҙылыуы факты ғына ла был турала етерлек һөйләй.

Көнбайыш державаларға үҙҙәренең пландарын үткәреү ауыр, сөнки улар халыҡтарҙың, беренсе нәүбәттә, немец һәм француз халыҡтарының йәшәү интерестәренә ҡаршы йүнәлтелгәндәр. «Общественный фекер, — тип яҙа «Дейли Уоркер» гәзитәһе — Франция хөкүмәте вәкилдәрен Лондондағы һөйләшеүҙәрҙе ташлап китергә һәм хатта яңынан килмәйәсәктәре менән ҡурҡытырға мәжбүр итте. Көнбайыш Германия өсөн барған ошо ныҡышмалы көрәштә Бевиндең «көнбайыш союзының» бөтә структураһы ҡурҡыныс аҫтында ҡалды», тип таныйҙар. Ысынлап та, Германияның хәрби ҡеүәте аяҡҡа баҫтырылған ваҡиғала, АҠШ-тан хәрби гарантиялар алмайынса, был союз Францияның именлеге проблемаһын бер нисек тә хәл итә алмай.

Немец халыҡы үҙе лә Германияны тарҡатыуға ҡаршы актив сығыш яһай. Англия-Франция-Америка власттарының ҡаршылыҡтарына һәм ҡаты эҙәрләүҙәренә ҡарамаҫтан, Германияның берҙәмлеге тураһында халыҡ референдумын үткәреү өсөн бөтә Германия буйынса подпись йыйыу немец халыҡының ошо мәсьәләлә тулыһынса берҙәмлеген күрһәтә.

ФИНЛЯНДИЯ ХАЛҠЫ ҮҘ ИНТЕРЕСТӘРЕН ҺАҠЛАЙ

Ҡайһы бер компартиялар вәкилдәренең информацион кәңәшмәһендә иптәш Жданов докладындағы, әгәр ҙә коммунистик партиялар үҙҙәрен ҡурҡытырға һәм шантажлауға ирк ҡуймаһалар һәм халыҡ демократияһын ныҡлы рәүештә яҡлаһалар, ул саҡта бер ниндәй ҙә реакция пландары тормошҡа ашырыла алмаясаҡтар, тигән положениеләрҙең гәзеллеген Финляндияла һуңғы көндәрҙә булған ваҡиғалар тағы ла бер тапҡыр раҫланылар.

Фин реакцияһы — эре капиталистәре һәм уларҙың агентураһы, уң һәм фашистик социал-демократик партияларҙың реваншистик элементтәре Финляндияның демократик көстәренә ҡаршы көрәшкә сығырға ҡарар иттеләр. Уларҙың талабы буйынса эске эштәр министре коммунист Лейно үҙенең посынан ситләтелде. Лейно, ес йыл буйынса ошо поста тороп, демократик гражданлыҡ азатлыҡтарға һөжүм итеүсе реакцияның этакаларын кире ҡаҡты.

Реакционерҙар коммунист министрҙан ҡотолоуға ғына түгел, бәлки эске һәм тышҡы политикаға реакцион курс биреүгә лә иҫәп тоттолар. «Коммунистарҙан эске эштәр министре портфелен тартып алыу, — тип белдерҙе Финляндия компартияһы башҡарма комитете, — хәҙерге демократик йүнәлеште үҙгәртеүҙе, Финляндияның үҙ-алдына йәшәүсе политикаһынан баш тартыуҙы һәм коммунистәр улар икенсе сортлы граждандар тигән Америкаса ҡараш нөктәһен таныуҙы аңлатыр ине».

Финляндия демократик көстәрен берләштереүсе ДСНФ (Финляндия халҡының демократик союзы) һәм коммунистәр партияһы, ысын халыҡ етәкселәре булыу йәһәтенән, халыҡтың үҙенә мөрәжәғәт иттеләр. Хельсинкиҙа күп халыҡ ҡатнашлығында эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәрҙең митингыһы үткәрелде. Митинг реакцияны ныҡ ғәйепләне, һәм Лейно, шулай уҡ ДСНФ членДәренән булған башҡа министрҙарға тулы ышаныс белдерҙе. Бөтә илдә эшселәр синифы демократияны ойошҡан рәүештә яҡлап сыҡты. Массовый протест забастовкалары килеп тыуҙылар. Ике көн эсендә баш күтәреүселәр һаны 100 мең кешегә етте. Финляндияның күп кенә урындарында забастовка дөйөм характер алды.

Эшселәрҙең һәм башҡа ҡатлам хеҙмәтсән халыҡтарҙың ойошҡанлығы һәм ныҡ тороусанлығы эре буржуазияның демократик көстәргә баһа биреп еткермәүен күрһәтте һәм был эре буржуазияны демократияға ҡаршы үҙенең һөжүмен бик тиҙ туҡтатырға мәжбүр итте. Хөкүмәт кризисе прогрессив деятель, ДСНФ яҡлы Эйно Кильтиҙе эске эштәр министре посына билдәләү юлы менән хәл ителде.

Бынан тыш компартия етәкселәренән береһе Хертан Куусинен портфелһеҙ министр сифатында хөкүмәт составына индерелде. Шулай итеп, коммунистәрҙең һәм СПЕ (компартия менән берлектә ДСНФ составына инеүсе социалистик берҙәмлек партияһы) элекке вәкилдәре хөкүмәткә ҡабат ҡайттылар.

ДСНФ Финляндиялағы ваҡиғалар айҡанлы үҙенең мөрәжәғәтендә реакция заговоры барын сыҡманы, тип билдәләй. «Был, бөтәһенән элек, Финляндияның хеҙмәтсән халыҡтары тарафынан күрһәтелгән хеҙмәт... Ләкин алда, — тип әйтелә мөрәжәғәттә, — тағы ла ҙурыраҡ эштәр тора. Әгәр ҙә реакция еңелеп тә үҙенең ынтылыштарын ҡабат яңыртырға теләй икән, хәҙерге курсты тағы ла нығытырға һәм һайлауҙарҙа еңеүҙе тәьмин итергә кәрәк».

Реакцияның һөжүме фин политикаһының демократик йүнәлешкә ҡурҡыныс тыуҙырғанлығын тағы ла яҡшыраҡ аңларға Финляндия хеҙмәтсәндәрен мәжбүр итте һәм хеҙмәтсәндәрҙең ныҡыраҡ туплаңыуына сәбәп булды.

А. Шатилов.

Япония компартияһы секретаре Носаканың белдереүе

ТОКИО, 27 май. (ТАСС). «Акахата» гәзитәһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Япония коммунистәр партияһы секретаре Носака 22 майҙа Япония парламентының түбәнге палатаһы ултырышында коммунистәрҙе общественный постарҙан ситләтеү тураһында Асиданың белдереүенә ҡарата һорау бирҙе.

— 20 майҙа түбәнге палата эргәһендәге сит ил эштәре буйынса комиссияла Такасеның һорауына яуап биреп, премьер-министр Асида, хәҙер коммунистәр партияһы членДәрен общественный постарҙан ситләтеү тураһындағы мәсьәләне тикшергәнлеген белдерҙе. Был бик серьез мәсьәлә булып тора, һәм ул коммунистәр партияһына ғына ҡағылып ҡалмай. Бындай хәрәкәт Потсдам декларацияһын һәм конституцияны боҙа һәм шуға күрә бөтә партиялар өсөн дөйөм проблема булып тора. Мин һеҙҙән Гитлерҙең Германияла нәмә эшләгәнлеге тураһында хәтерегеҙгә төшөрөүегеҙҙе һорайым. Демократияны бөтөргәндә һәм фашизмде урынлаштырғанда, ул барынан элек коммунистәр партияһын һәм социал-демократтарҙы быуҙы. Ошо юл менән ул демократик политик партияларҙы быуҙы. Ошо юл менән башта, демократияны бөтөрөү өсөн, бөтә демократик партиялар башында торған коммунистәр партияһын быуҙы. Ошо фактыны иҫәпкә алғанда, премьер-министрҙең белдереүе коммунистәр партияһы өсөн генә проблема түгел, бәлки Япониялағы бөтә политик партиялар өсөн мөһим дөйөм проблема булып торғанлығы бөтөнләйгә асыҡлана. Был ғына ла түгел, ошо проблеманың халыҡ-ара әһәмиәте бик ҙур. Хәҙерге ваҡытта донъяла реакцион тенденциялар йәшәй. Премьер ошо ваҡиға менән файҙалана — бөгөн компартияға ҡаршы күрелгән саралар, һуңынан социал-демократтарға ҡаршы һәм унан һуң либералдарға ҡаршы күреләсәк. Унан һуң нәмә булыр? Ләкин коммунизмға ҡаршы көстәр донъяла берҙән-бер көс булып тормайҙар. Премьер бөтә донъяның демократик көстәре алдында яуап бирергә тейеш.

Коммунистәр партияһы һеҙгә түбәндәге һорауҙар менән мөрәжәғәт итә:

Премьер-министр, коммунистәр партияһы членДәрен общественный постарҙан ситләтеү тураһындағы мәсьәләне тикшереүен белдерҙе. Ни өсөн ул был постарҙан бары тик коммунистәр партияһы членДәрен генә ситләтергә уйлай? «Общественный поста тороусы кеше» тигән һүҙҙәр бик ҙур әһәмиәткә эйә булып торалар. Постарҙа тороусы кешеләр тураһында үҙ ваҡытында парламент тарафынан ҡабул ителгән закон шул турала һөйләй. Бында премьер-министрҙан алып ҡала һәм ауыл ойошмаларындағы постарҙа тороусы кешеләр инә. Һеҙ общественный постарҙың барыһынан да коммунистәр партияһы членДәрен ситләтеү тураһындағы мәсьәләне тикшерәһегеҙме?

Потсдам декларацияһы Японияла политик азатлыҡҡа гарантия бирә. Премьер-министр үҙенең ошо белдереүе менән азатлыҡты боҙа, һәм ғәҙеллекһеҙ рәүештә коммунистәр партияһын дискриминацияларға һәм уны быуырға уйлағанлығын белдерә. Шунан ары, уның белдереүе конституцияның 14-се статьяһын боҙа. Был статьяла бөтә политик партияларға бер ниндәй дискриминацияһыҙ политик хәрәкәт азатлығы рөхсәт ителергә тейеш, тип әйтелә.

Ошо һорауға яуап биреп, премьер-министр Асида «туранан-тура политик хәрәкәт формаларын алыусы профсоюз хәрәкәтен» тыйыуҙы ныҡышмалы рәүештә талап итте. Асида, Япония хөкүмәте коммунистәрҙе общественный постарҙан ситләтеү тураһындағы мәсьәләнә өйрәнә, тип яһаған үҙенең элекке белдереүен яңынан ҡабатланы. «Беҙ,—тине ул,—был йәһәттән күптән түгел индерелгән Англия законының күсермәһен аласағыбыҙға ышанабыҙ. Беҙ өйрәнеү өсөн был күсермәне ала алманыҡ әле, ләкин беҙ уны яҡын киләсәк ваҡытта алыуыбыҙға ышанабыҙ. Ошо мәсьәлә буйынса әлегә тиклем әйтелгән ҡараштар минекеләр, ә хөкүмәт бер ниндәй ҙә ҡарарға килмәне әле».

— Хәҙер беҙҙең был мәсьәләне өйрәнеүебеҙ, тип өҫтәне Асида, нигеҙҙә коммунистәр партияһына, уның членДәренә хөкүмәт учреждениеләрендә эшләргә юл ҡуйырға мөмкинме йәки юҡмы икәнлеген асыҡлауға ҡайтып ҡала. Беҙ ошо мәсьәлә буйынса Англия хөкүмәтенең ҡараш нөктәһен өйрәнергә һәм Англияның был йәһәттән ниндәй закондар индергәнлеген белергә уйлайбыҙ.

Беҙҙең республикала

Мартенсөләрҙең еңеүе

Белорет металлургия комбинаты мартенсөләре йөкләмәләрен намыҫлы үтәнеләр. Май айы планы срогынан биш көн алда үтәлде һәм улар заданиенән тыш бик күп ҡорос бирҙеләр.

Цехтар-ара социалистик ярышта мастер Махиянов һәм Красулин иптәштәр етәкселек иткән цехтар ярышта еңеүсе булып таныдылар. Улар айлыҡ заданиене 128 процентҡа еткереп үтәнеләр.

Йыллыҡ планды— 7 ноябргә

1-се номерле кирбес заводы (Өфө) 27 майҙа бөтә төр продукция етештереү буйынса ярты йыллыҡ планды 102 процентҡа үтәне. Социалистик ярышта иптәш Полетавкиндең 2-се номерле цехы алда бара. Цех ярты йыллыҡ планды арттырып үтәне.

Хәҙер завод эшселәре араһында Октябрь революцияһының XXXI йыллығы көненә — 7 ноябргә йыллыҡ планды үтәү өсөн көрәш башланды.

Ярты миллион һум экономия

Өфөләге «Аккумулятор» артеле коллективы социалистик ярышты киң йәйелдереү һөҙөмтәһендә производствоның ярты йыллыҡ программаһын тамамланы.

Быйыл цехтарҙың бинаһы ҙурайтылды, яңы станоктар ҡуйылды. Эшләп сығарыу ҡеүәте лә артты. Ошонан һөҙөмтәһендә артель биш ай эсендә пландан тыш ярты миллион һумдан артыҡ экономия бирҙе.

Артель коллективы йыллыҡ программаны 7 ноябргә үтәргә йөкләмә алды.

Емеш-еләк баҡсалары

ӘУЫРҒАЗЫ. Районның колхоздарында емеш-еләк баҡсалары ултыртыла. Бында 10 гектар урынына 11 гектар ҡарағат, ҡурай еләге, алма, муйыл һәм милаш ағастары ултыртылды. «Үрнәк», «Бәгәнәш», «Юлдаш», «Батыр бүләк» һәм «Сафиполь» колхоздары берәр гектар ағас ултырттылар.

* * *

Ҡаҙанғол орлоксолоҡ совхозы (Дәүләкән районы) коллективы ағымдағы йылда 2,5 гектар майҙанда емеш баҡсаһы ултыртты.

Был баҡсаға Бозаяҙ район государство питомнигенән ҡайтарылған 450 төп төрлө сорт алма ағастары һәм күп һанда ҡарағат ҡыуаҡтары ултыртылды.

Киҙе-мамыҡ комбинаты үҙ территорияһын таҙартыу буйынса воскресник ойошторҙо.

Һүрәттә: воскресниктан бер күренеш.

В. Жданов фотоһы.

Балалар ялы

Ғәжәп матур йәй. Ул балаларға күпме хәстәрлек, ни тиклем ҡыҙыҡлы көндәр, сәғәттәр алып килә.

Башҡаланың 650 уҡыусыһы июнь башында Иоматауға, Шаҡшаға һәм пионер лагерҙәре асылған башҡа урындарға китәләр. Мәктәпкәсә йәштәгеләрҙән бер меңдән артыҡ бәләкәйҙәр июнь айында һауыҡтырыу майҙансыҡтарында буласаҡтар.

Был шатлыҡлы йәйҙең башланғысы ғына әле. Өфө мәктәптәрендә үҫмерҙәр походтарға әҙерләнәләр. 44-се номерле урта мәктәп уҡыусылары Белорецҡа ... бай прииска ларына барырға ..., балалар, ә 31-се мәктәптә тәрбиәләнеүселәр Ҡариҙел үрен[ә] ... ләрҙә күтәреләсәктәр.

Пионер лагере асыла

Өфө металл штамплау заводы ошо йылдың июнендә Ҡариҙел буйына пионерҙар өсөн лагерь аса. Лагерь йәйге сезонда ес смена эшләргә тейеш. Һәр бер сменала пионерҙәр 21 көн ял итәсәктәр. Фронтта һәләк булған воиндарҙың һәм Ватан һуғышы инвалидтарының балалары лагерғә беренсе нәүбәттә ебәреләсәк.

Ағымдағы йылда завод эшселәрен һәм уларҙың балаларын ял йорттарына ебәреү өсөн ... ком тарафынан 55 мең һум ... бүленде.

Электр станцияһы ходҡа ебәрелде

Ишмәкәй районының «Игенсе» колхозы членДәре Сулле йылғаһына гидроэлектр станция һалдылар. Станция 10 майҙа ходҡа ебәрелде. Ул клубты, уҡыу өйҙәрен, малсылыҡ фермаларын һәм колхозсыларҙың торлаҡ йорттарын электр энергияһы менән ... ләндерә.

Быйыл колхоз ашлыҡты ... көсө ярҙамында һуғасаҡ.

Йылына 78 мең себеш

Ағымдағы йылда Талбаҙы инкубатор станцияһы (директоры иптәш Голиченко) колхоздарға 78 мең тауыҡ себеше, өйрәк һәм ҡаҙ бәпкәләре биреүҙе планлаштырҙы. Хәҙер ике инкубаторға 33 мең 274 тауыҡ, өйрәк һәм ҡаҙ йомортҡаһы һалынды. Майҙың беренсе яртыһында станция 2.298 ... себеше сығарып, Әуырғазы районының «Красный пахарь», «Юлдаш», «Марс», «Әуырғазы» колхоздарына бирҙе.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Мәжбүри окладной страхование тураһында

СССР Союзы Верховный Советының 1940 йылдың 4 апрелендә ҡабул ителгән мәжбүри окладной страхование тураһындағы Законы һәм СССР Финанс Министерствоһының 1946 йыл 9 сентябрендәге 614-се номерле инструкцияһы нигеҙендә, 1948 йылдың 1 июненән Госстрах органдары бөтә еҙҙә лә колхоздарҙа һәм граждандар хужалыҡтарында мәжбүри окладной страхование үткәрелергә тейешле объекттарҙы (төҙөлештәрҙе, малдарҙы, ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен һәм башҡа төр милектәрҙе) иҫәпләүгә тотоналар.

Иҫәпкә алыу тамамланыу менән, ләкин 1948 йылдың 1 сентябренән дә һуңға ҡалмайынса, үҙ милкен страховать иткән һәр бер кешегә түләнергә тейешле страховойҙың суммаһы һәм түләү срогы күрһәтелеп, страховой түләү тураһында таныҡма (белдереү) бирелә.

Страхование сборы түбәндәге сроктарҙа түләнә: колхоздар 1948 йылдың 15 сентябренә дөйөм страховой сумманың 40 процентен, 1 ноябргә — 30 процентен һәм 1 декабргә — 30 процентен индерәләр. Колхозсылар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм башҡа граждандар 1948 йылдың 15 сентябренә 50 процентен, 1 ноябргә 50 процентен индерәләр.

Мәжбүри окладной страхование тәртибендә страховать ителгән милк зыянланғанда һәм зарарланған ваҡиғала госстрах күрелгән зыян өсөн аҡса түләй:

Төҙөлештәр страховать итеү буйынса, ә колхоздарҙа инвентарҙар, оборудованиелар, транспорт средстволары, продукция, сырье һәм материалдар страховать итеү буйынса — уттан, йәшен һуғыуҙан, шартлауҙан, ташҡындарҙан, ер тетрәүҙән, көслө дауылдарҙан, өйәрмәләрҙән, көслө ямғырҙарҙан, боҙ һуғыуҙан, емерелеү һәм башҡаларҙан килгән зыян өсөн; ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен страховать итеү буйынса боҙ һуғыуҙан, көслө ямғырҙарҙан, дауылдарҙан ашлыҡ ҡамылда саҡта яныуҙан, ер артыҡ дымлы булыу арҡаһында сереүҙән, туңыуҙан, боҙолоуҙан, ҡырауҙан һәм ташҡындарҙан килгән зыян өсөн; малдар страховать итеү буйынса—ауырыу һәм ҡартлыҡ арҡаһында үлеүҙән, башҡа ҡазалар килеү сәбәпле ярһеҙ (ветеринар врачтың йәки ветеринар фельдшерҙең рөхсәте буйынса) һуйыуҙан килгән зыян өсөн госстрах аҡса түләй.

Страховать ителгән милектең көтөлмәгән бәлә-ҡазанан зыянлауы һәм зарарланыуы тураһында колхоздар — ауыл Советына йәки страховать итеү пунктына, ә колхозсылар — ауыл, район йәки ҡала Советына хәбәр итергә тейештәр.

БӨГӨН ТЕАТРҘАРҘА ҺӘМ КИНОЛАРҘА

Башгосфилармонияла — Л... госфилармония артистәре ... ле (Рига ҡалаһы) юмор һәм ... ҙар кисәһе). (Еврей телендә). К... ке 9 сәғәттә башлана.

«Октябрҙә» — көндеҙ — «... РЕНСЕ КЛАСС УҠЫУСЫ...». Кис — «ГРОЗА».

Матросов исемендәге кино... «ҠЫҘЫЛ ГАЛСТУК». 31 ... — «ВАЛЕРИЙ ЧКАЛОВ».

8-се Март исемендәге ... фабрикаһына тегеүселәр-... тористкалар, тегеүселәр, ... тромонтерҙар, бикусылар, ... ләрҙәр, ҡатын-ҡыҙҙар ... баш кейемдәре тегеү ... ҙәре, эшселәр, ҡатын-ҡыҙ... күлдәктәре киҫеүсе ... ителә. Эш хаҡы килеш... йынса түләнә.

Белешмәләр алыу тура... да иртәнге 10 сәғәттән ... көндөҙгә 4 сәғәткә ... кадрҙар бүлегенә мөрә... итергә.

Кадрҙар бүлегенең ад... Өфө ҡалаһы, Сталин ур... 2-се номерле корпус.

Благовещендәге ауыл ... жалығы мәктәбенә балта... талары, мейес сығарыу... ташсылар талап ителә.

Белешмәләр алыу өсөн ... бәндәге адресҡа мөрә... итергә: БАССР, Благове... заводы, Киров урамы, ... номерле йорт.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00156. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 108
1
июнь
шишәмбе

Хаҡы 20 тин

Туймазы районы яҙғы сәсеү планын үтәне

Туймазы районы игенселәре бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинга яҙған хатта быйыл юғары урожай үҫтерергә вәғәҙә иттеләр. Юғары урожай өсөн көрәштең беренсе этабы — яҙғы сәсеү уңышлы тамамланды. План тулыһынса үтәлде, 22 мең 580 гектар ашлыҡ сәселде.

Сәсеүҙең беренсе көндәренән үк туймазылылар ҙур күтәренкелек менән эшләнеләр. Май айының башында «Үрнәк», «Балағас күл» колхоздары сәсеүҙе тамамланылар. Башҡа ауыл хужалығы артелдәрендә лә эш юғары темп менән барҙы. Май айының бишенсе биш көнлөгөндә район ирта культуралар сәсеү планын үтәне.

Сәсеүҙең тәүге биш көнлөгөндә үк БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алған Туймазы игенселәре уны сәсеү тамамланғанса үҙ ҡулдарында һаҡланылар. Хәҙер районда пландан тыш ашлыҡ сәсеү дауам итә.

Совет фәненең тантанаһы

Бөгөн — совет фәненең ҙур байрамы. Беҙҙең илебеҙҙәге ғалимдәр төркөмөнә фәндең бик күп төрлө өлкәләрендәге күренекле тикшеренеүҙәр өсөн Сталин премиялары бирелде.

Йыл һайын Сталин премияларын биреү совет фәненең өлгәшеүҙәренә традицион смотр, бөтә халыҡ тантанаһы булып әүерелде. Был аңлашыла ла. Беҙҙең совет фәне — ысын халыҡ фәне ул. Ул халыҡ интерестарына, илдең хеҙмәт етештереүсәнлек көстәрен үҫтереүгә, коммунизм төҙөү эшенә ышаныс һәм дөрөҫлөк менән хеҙмәт итә.

Фән беҙҙең илебеҙҙә большевиктар партияһының, Совет Хөкүмәтенең һәм лично иптәш Сталиндең даими иғтибары һәм хәстәрлеге менән уратып алынған. Фәндең бөйөк корифейы иптәш Сталин совет ғалимдәрен батыр ижади эҙләнеүҙәргә рухландыра, беҙҙең фәнебеҙҙе яңынан-яңы уңыштарға алып бара. Совет фәне деятелдәре — коммунизм төҙөүҙә актив ҡатнашыусылар — халыҡ алдында почет, хөрмәт һәм мөхәббәт менән файҙаланалар.

Һәр бер йылдағы Сталин премияларына лайыҡлы булған эштәр совет фәненең яңы өлгәшеүҙәрен, уның арымай-талмай алға табан барыуын, уның билдәле маҡсатҡа йүнәлтелгән булыуын, төп һәм хәл иткес йүнәлештәр алырға һәләтлеген күрһәтә. Уның тапалған һәм шаблонлы юлдар буйынса түгел, ә әле тиклем билдәле булмаған яңы юлдар буйынса батыр рәүештә алға табан юл һалырға, ныҡышмалы экспериментал эштәр нигеҙендә яңы бик горизонттар асыуҙы һығымталарға тиклем күтәрелергә. Ошо сифаттар быйылғы Сталин премиялы лауреаттары эшендә айырыуса күренеп тора.

Совет физиктары, космос нурҙарын өйрәнеүҙә пионерҙар булған хәлдә, ошо нурҙар составында яңы, әлегә тиклем билдәле булмаған [illegible] асыу менән матдәнең төҙөлөшөн белеүҙә ҙур алға китеш яһанылар. Совет математиктары, халыҡ хужалығының математиканы ҡулланыуҙың яңынан яңы өлкәләрен асып, совет математикаһын фәнде алға ебәрәләр. Бөгөнгө көндә техникаһы — был юғары тиҙлек, юғары басымдар һәм юғары температуралар техникаһы. Совет ғалимдәренең эштәре инженерҙарҙы алдынғы техниканың талаптарына тулыһынса яраҡлы рәүештә материалдарҙы һәм төҙәлештәрҙе иҫәпләүҙә яңы методтар менән ҡоралландыра. Беҙҙең илебеҙҙә ғалимдәре, Сталин премиялары лауреаттарының эшенән күренгәнсә, үҙҙәренең эштәре менән һуғыштан һуңғы бишйыллыҡты үтәү барышында килеп тыуған иң ҡатмарлы мәсьәләләрҙе эшләп сығаралар.

Ер аҫты һәм тау эштәрен үткәреү [illegible] ҡусеүен килтереп тыуҙыра. Тау басымы мәсьәләһе буйынса бөтә донъя фәненең пионерҙары булып торған совет ғалимдәре был ҡусеүсен механикаһын асалар, тау тоҡомдарының ҡусеүен иҫәпләү өсөн бик ныҡ камиллашҡан методтар бирәләр.

Яҡын килеп сыҡҡан йылдар бик ҙур күләмдә гидротехник эштәр үткәреү йылы булыр. Был өлкәлә эшләүсе совет ғалимдәре ер аҫты һыуҙарының хәрәкәт итеүенең ҡатмарлы мәсьәләләрен уңышлы рәүештә хәл итәләр, гидротехник ҡоролоштарҙы иҫәпләүҙең яңы методтарын [illegible] ралалар.

Совет химиктары һәм биологтары бөтә донъя фәненең үҫешендә яңы юлдар һалып, үҙ өлкәләрендә батыр рәүештә яңы мәсьәләләр ҡуйып һәм хәл итәләр. Уларҙың иғтибар үҙәгендә белок төҙөлөшөн тикшереү кеүек хәҙерге фәндең ҙур проблемалары тора. Совет ғалимдәре [illegible] тип атала торған яңы ҡушылмаларҙың синтезын яһайҙар, техниканың күп кенә алдынғы тармаҡтарында ҙур иткес роль уйнарға саҡырылған яңы металлоорганик ҡушылмалар буйынса эш алып баралар.

Илдең төбөндәге байлыҡтарын тикшереү, уларҙы халыҡҡа хеҙмәт иттереү өсөн совет геологик фәненең әһәмиәте бөтә кешегә билдәле. Беҙҙең агрономия фәнебеҙ ауыл хужалығын күтәреү эшенә шулай уҡ ныҡ хеҙмәт итә. Илдең мөһим районларын геологик яҡтан тикшереү, уның үҫемлек ресурстарын һәм тупрағын тикшереү, ауыл хужалығы культураларының селекцияһы — быларҙың бөтәһе лә, бигерәк тә Сталин премиялары менән билдәләнгәндең яҡшылары совет промышленносен һәм ауыл хужалығын артабан үҫтереүҙә ҡеүәтле рычаг булып торалар.

Медицина фәне деятелдәренең Сталин премияһына лайыҡлы хеҙмәттәрендә был фәнде совет кешеләренең һаулығын һаҡлауға хеҙмәт итергә ҡуйырға ынтылыш бик асыҡ күренә. 1947 йылда улар быуаттар буйынса кешеләрҙе яфалаған ауырыуҙарҙы дауалауҙың бик күп яңы методтарын һәм средстволарын таптылар, ауырыу кешеләрҙең ғазапланыуҙарын еңеләйтеүсе һәм йөҙ меңләгән кешеләрҙең ижади хеҙмәткә кире ҡайтыуҙарын тиҙләтеүсе яңы хирургик ысулдар һәм операциялар эшләнеләр.

Сталин премияһы менән билдәләнгән фәнни эштәр араһында общественный фәндәр өлкәһендәге эштәр күренекле урын алып торалар. Экономик фәндән Н. А. Вознесенскийҙең капиталь эше бүләкләнде. Был хеҙмәттә Вознесенский Бөйөк Ватан һуғышы осоронда совет экономикаһының үҫеш закондарына һәм планлы совет хужалығының артабан үҫеш юлдарына тәрән анализ яһай. Тарих өлкәһендә Сталин премияһы лауреаттарының эштәре бик ҙур интерес ҡаҙаналар. Славяндар тарихы буйынса һәм СССР халыҡтары тарихенең айырым осорҙары буйынса ҙур йылда тәрән тикшеренеүҙәр баҫылып сыҡҡайны.

1947 йыл өсөн бирелгән Сталин премиялары беҙҙең илебеҙҙә фәндең бөтә өлкәләрҙә [illegible] булыуын күрһәтә.

Сталин премиялары менән билдәләнгән күп кенә эштәр илебеҙҙең үҙәктән алыҫ булған ҡалаларында һәм республикаларында эшләнгән. Был бик күренекле хәл. Ул, культура үҫешенең генә түгел, бәлки беҙҙең бөйөк, киң Тыуған илебеҙҙең бөтә мөйөштәрендә лә совет ғалимдәренең ижади эштәре өсөн шарттар тыуҙырылғанлығы тураһында асыҡ итеп күрһәтә. Беҙҙең ғалимдәребеҙ уңыштары бик ҙур — бөтә совет халҡы уларға шатлана һәм улар менән ғорурлана. Шулай менән бергә, фәндең күп кенә өлкәләренең артта ҡалғанлығын билдәләп үтергә кәрәк. Мәҫәлән, Сталин премиялары лауреаттары исемлегендә философия һәм юридик фәндәренең бер генә работнигы ла юҡ. Тарих фәне буйынса Сталин премияһына лайыҡлы булған эштәр араһында Совет государствоһының үҫеше тарихына арналған хеҙмәттәр юҡ. Был — ҙур етешһеҙлек, уны [illegible] кәрәк. Общественный фәндәр работниктары үҙҙәренең иң мөһим участкала торғанлыҡтарын, идеологик фронттың алдынғы позицияларында торғанлыҡтарын онотмаҫҡа тейештәр.

Большевиктар бер ваҡытта ла өлгәшелгәндәр менән тынысланып ҡалмайҙар. Сталин премиялары биреү беҙҙең ғалимдәребеҙҙе, бөтә совет интеллигенцияһын артабан ныҡышмалы эшкә, фәндең бөтә өлкәләрендә [illegible] саҡыра. Был совет фәненең һәм техниканың [illegible] юл аса. Уларға тик тороу хас түгел, уларға туҡтауһыҙ рәүештә алға һәм алға табан ҡарап итеү хас.

Беҙҙең социалистик обществобыҙҙың, беҙҙең совет государствобыҙҙың, уның экономикаһының һәм культураһының үҫеше иң алдынғы һәм революцион теорияның гранит фундаментына — общество үҫешенең фәнни нигеҙҙәре тураһындағы Маркстың—Энгельстең—Лениндең — Сталиндең өйрәтеүенә нигеҙләнгән. Үҙ ғалимдәренең ижади хеҙмәттәре өсөн бөтә кәрәкле шарттар булдырып, [illegible] беҙҙең бөйөк социалистик Тыуған илебеҙҙең данлы өсөн, Лениндең—Сталиндең бөйөк эше — коммунизм эшенең тантанаһы өсөн [illegible], Совет фәненең бөтә деятелдәренә һәм уның алдынғы отрядына — Сталин премиялары лауреаттарына — алдынғы совет фәненең артабан ҙур сәскә атыуы өсөн яңынан яңы уңыштар теләйбеҙ!

(«Правда» газетаһының 30 май баш мәҡәләһе).

ССР СОЮЗЫ МИНИСТРҘАР СОВЕТЕНДӘ

1947 йылда фән өлкәһендә күренекле эштәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

ССР Союзы Министрҙар Советы 1947 йылда түбәндәге өлкәләрҙә күренекле ғилми эштәр өсөн Сталин премиялары бирергә ҡарар итте:

А) Физика-математика фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Алиханов** Абрам Исааковичҡа, академик, **Алиханян** Артемий Исааковичҡа, Әрмән ССР-ы фәндәр Академияһының действительный члены, Әрмән ССР-ы фәндәр Академияһының Физика институты директорына, — космос нурҙары өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәре өсөн. Был тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре «Диңгеҙ кимәленән 3.250 метр юғарылыҡта космос нурҙарының йомшаҡ компоненты составы», «Мезотрон һәм протон массалары араһында булған массала кескәй өлөштәрҙең йәшәүе тураһында», «Варитрон массаларының спектры» тигән мәҡәләләрҙә 1945—1947 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан.

2. **Чеботарев** Николай Григорьевичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспондентына,—1947 йылда баҫылған «Резольвент проблемалары» монографияһында бирелгән алгебра тигеҙләмәләре теорияһы буйынса төплө тикшеренеүҙәре өсөн.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Шальников** Александр Иосифовичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, СССР фәндәр Академияһының физика проблемалары Институты лабораторияһы мөдиренә,—үтә еңел үткәреүсәнлек буйынса экспериментал тикшеренеүҙәр өсөн, уларҙың һөҙөмтәләре 1946—1947 йылдарҙа баҫылған «Температура үҙгәрештәре араһындағы торошонда үтә еңел үткәргестәрҙең структураһы» һәм «Температура үҙгәрештәре араһындағы торошонда үтә еңел үткәргестәрҙә тышҡы күренештәр» тигән мәҡәләләрҙә бирелгән.

2. **Смирнов** Владимир Ивановичҡа, академик, Ленинград государство университеты профессорына, — баҫылыуы 1947 йылда тамамланған биш томлы «Юғары математика курсы» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

3. **Голузин** Геннадий Михайловичҡа, Ленинград государство университеты профессорына, — комплекслы үҙгәреш функциялары теорияһы буйынса булған эштәре өсөн, был эштәрҙең һөҙөмтәләре 1946—1947 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Конформ сағылышында вариациялар методы», «Боҙоп күрһәтеү теоремалары һәм бер листле функциялар коэффициенттәре тураһында» тигән мәҡәләләрҙә яҙылған.

Б) Техник фәндәр өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Ильюшин Алексей Антоновичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университеты профессорына,— пластичность теорияһы өлкәһендә ғилми тикшеренеүҙәре өсөн, быларҙың һөҙөмтәләре 1944—1947 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Пластиҡаларҙың һәм оболочкаларҙың һығылмалыҡ сигенән тыш тотороҡлоғо», «Пластиналарҙың һығылмалы-пластик тотороҡлоғо», «Һыҙамлы материалдан яһалған әйберҙәрҙе ябай юл менән ауырайтҡанда һығылмалыҡ теорияһы» тигән мәҡәләләр серияһында яҙылған.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Авершин** Степан Гавриловичҡа, Ленинград тау институты профессорына, — 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Ер аҫты эштәре үткәргәндә тау тоҡомдарының ҡусеүе» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

2. **Лехницкий** Сергей Георгиевичҡа, Чернышевский исемендәге Саратов государство университеты профессорына, — 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Анизотропный пластинкалар» монографияһында дөйөмләштерелгән упругость теорияһы өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәре өсөн.

3. **Нельсон-Скорняков** Федор Борисовичҡа, Мәскәү туҡыу институты профессорына, — ер аҫтынан сыға торған мөһим практик әһәмиәтле һыуҙарҙың гидродинамикаһы өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәре өсөн, был тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Бер төрлө средала фильтрлау» монографияһында дөйөмләштерелгән.

4. **Шаумян** Григор Арутюновичҡа, Мәскәүҙең Бауман исемендәге юғары техник училище профессорына,—станок-автоматтар конструкциялаштырыуҙың теоретик нигеҙҙәрен эшләп сығарыуы өсөн, уның был эштәре 1946 йыл аҙағында баҫылып сыҡҡан «Станок-автоматтар проектлаштырыу теорияһы нигеҙҙәре» тигән ғилми хеҙмәттә яҙылған.

В) Химия фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Зелинский Николай Дмитриевичҡа, академик, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университеты профессорына, **Гаврилов** Николай Ивановичҡа, шул уҡ университет профессорына, — белок химияһы өлкәһендә күп йыллыҡ тикшеренеүҙәре өсөн, был эштәрҙең һөҙөмтәләре 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Белок молекулаһында аминокислоталар бәйләнештәренең циклик тәбиғәте тураһындағы мәсьәләнең хәҙерге торошо» тигән хеҙмәттә бирелгән.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Кочешков** Ксенофонт Александровичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, Мәскәүҙең М. В. Ломоносов исемендәге государство институтының профессорына, — 1947 йыл баҫылып сыҡҡан «4-се төркөм элементтарҙың металлоорганик ҡушылмалары өлкәһендә синтетик методтар» тигән монографияһында яҙылған, металлоорганик ҡушылмалар өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәре өсөн.

2. **Новосёлова** Александра Васильевнаға, Мәскәүҙең М. В. Ломоносов исемендәге государство университеты профессорына, — һирәк элементтар химияһы өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәре өсөн, был тикшеренеүҙәрҙең һөҙөмтәләре 1947 йылда баҫылып сыҡҡан.

3. **Кнунянц** Иван Людвиговичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, химия һаҡлығы Хәрби академия профессорына, — органик химия өлкәһендәге ғилми тикшеренеүҙәре өсөн, һөҙөмтәләре 1946—1947 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан: «Фторҙы органик ҡушылмаларға индереү методтары», «Алифатик эселектәрҙең фторлы водород менән үҙ ара йогонтолары тураһында», «Органик эселектәрҙең фосфорлы водород менән реакцияһы тураһында» тигән мәҡәләләр серияһында яҙылған.

4. **Куприц** Яков Николаевичҡа, аҙыҡ промышленносеның Мәскәү технология институты профессорына, — он тартыу промышленносендә технология процесенең теоретик нигеҙҙәрен эшләгәне өсөн, ул 1946 йылда баҫылып сыҡҡан «Ашлыҡ тарттырыуҙың физик-химик нигеҙҙәре» тигән монографияһында яҙылған.

5. **Терентьев** Александр Петровичҡа, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университетының профессорына, — органик ҡушылмалар синтезының яңы методын тыуҙырыуы өсөн, ул «Ацидофобный ҡушылмаларҙы сульфирләштереү» тигән хеҙмәтендә 1947 йылда баҫылып сыҡҡан.

Г) Геология-география фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Батурин Владимир Петровичҡа, профессор, геология—минералогия фәндәре докторына, — ер аҫты ҡатламы байлыҡтарын — нефть, күмер һәм башҡаларҙы эҙләүҙә ҙур әһәмиәте булған, осадочный породаларҙың петрографияһы өлкәһендә эҙләнеүҙәре өсөн; был ғилми хеҙмәт 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Терриген компоненттәре буйынса геологик үткәнгә петрографик анализ» тигән китабында дөйөмләштерелгән.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Страхов** Николай Михайловичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, СССР-ҙың геология фәндәре Институтының лаборатория мөдиренә, — тимер, марганец һәм боксит рудалары ятыштарын өйрәнеүҙә ҙур әһәмиәте булған геологик тикшеренеүҙәре өсөн, был тикшеренеүҙәр 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Тимер рудаларының фацияһы һәм ер тарихында уларҙың аналогиялары» исемле монографияһында яҙылған.

2. **Ренгартен** Владимир Павловичҡа, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденты, Үҙәк геология-разведка ғилми-тикшеренеү музейының директорына, — Кавказды геологик тикшереүҙәре өсөн, был 1947 йылда баҫылған «Төньяҡ Кавказ» («СССР геологияһы», том IX) тигән хеҙмәтендә дөйөмләштерелгән.

3. **Чернов** Василий Андреевичҡа, геология-минералогия фәндәре докторы, СССР фәндәр Академияһының В. В. Докучаев исемендәге Тупраҡты өйрәнеү институтының өлкән ғилми сотрудникына,— 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Тупраҡ әсеткеслегенең тәбиғәте тураһында» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

Д) Биология фәндәре өлкәһендә

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Гроссгейм** Александр Альфонсовичҡа, академик, Әзербайжандың С. М. Киров исемендәге государство университеты профессорына, — 1946 йыл аҙағында баҫылып сыҡҡан «Кавказдың үҫемлек ресурстары» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

2. **Бернштейн** Николай Александровичҡа, СССР медицина фәндәре академияһының член-корреспонденты, И. В. Сталин исемендәге Үҙәк государство физкультура институтының профессорына, — хеҙмәт процесы һәм физик культура менән бәйләнештә кеше хәрәкәтенең физиологияһын өйрәнеү буйынса оҙаҡ йылдар эшләгәне өсөн, был эш 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Хәрәкәттәрҙең төҙөлөшө тураһында» тигән монографияһында дөйөмләштерелгән.

3. **Павлов** Николай Васильевичҡа, Ҡаҙаҡ ССР-ы фәндәр Академияһының действительный членына, — 1947 йылда баҫылған «Ҡаҙағстандың үҫемлек сырьеһы» исемле хеҙмәте өсөн.

(Аҙағы 2-се биттә).

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

НИКОЛАЙ АЛЕКСЕЕВИЧ ВОЗНЕСЕНСКИЙ.

БОРИС ДМИТРИЕВИЧ ГРЕКОВ.

НИКОЛАЙ СЕВАСТЬЯНОВИЧ ДЕРЖАВИН.

АЛЕКСЕЙ АНТОНОВИЧ ИЛЬЮШИН.

ССР Союзы Министрҙәр Советендә

1947 йылда фән өлкәһендә күренекле эштәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

Е) Ауыл хужалығы фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Лысицын Петр Ивановичка, В. И. Ленин исемендәге ауыл хужалығы фәндәренең Бөтә Союз академияһының действительный членена, — клевер селекцияһының ғилми нигеҙҙәрен һәм был культураның урожайын күтәреүҙә агрономия сараларын эшләүе өсөн. Был хеҙмәт 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Кыҙыл клеверҙең биологияһы мәсьәләләре» тигән монографияһында бирелгән.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Смелов** Сергей Петровичка, биология фәндәре докторы, мал аҙыҡтары ғилми-тикшеренеү Бөтә Союз институты лабораторияһының мөдиренә, — 1947 йылда баҫылып сыҡҡан, болондарҙы, көтөүлектәрҙе яҡшыртыуҙа һәм уларҙы дөрөҫ файҙаланыуҙа ҙур әһәмиәте булған «Болонсолоктоң биологик нигеҙҙәре» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

2. **Якушкин** Иван Вячеславовичка, В. И. Ленин исемендәге ауыл хужалығы фәндәренең Бөтә Союз академияһының действительный членене, К. А. Тимирязев исемендәге Мәскәү ауыл хужалығы академияһының профессорына, — 1947 йылда баҫылған «Үҫемлекселек» тигән хеҙмәтендә дөйөмләштерелгән ауыл хужалығы культураларының агротехникаһы буйынса эше өсөн.

Ж) Медицина фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Тимофеевский Александр Дмитриевичка, СССР медицина фәндәре Академияһының действительный членене, УССР фәндәр Академияһының А. А. Богомолец исемендәге клиник-физиология институты профессорына, — яман шештәрҙе өйрәнеү, уларға ҡаршы көрәш сараларының яңы юлдарын асҡан ғилми эштәре өсөн, был хеҙмәт 1947 йылда баҫылған «Кеше шештәренә эксплантация» тигән монографияһында дөйөмләштерелгән.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Чирковский** Василий Васильевичкә, СССР медицина фәндәре Академияһының действительный членене, И. П. Павлов исемендәге Ленинград 1-се медицина институты профессорына, — трахома профилактикаһын, уны дауалауҙы һәм дөрөҫ билдәләүҙе өйрәнеү буйынса оҙаҡ йылдар тикшеренеүе өсөн, был эш 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Трахома» тигән ғилми хеҙмәттә дөйөмләштерелгән.

2. **Лимберг** Александр Александровичкә, СССР медицина фәндәре Академияһының член-корреспонденте, врачтарҙың белемен камиллаштереү буйынса С. М. Киров исемендәге государство институтының профессорына, — организмде төҙәтеү хирургияһы өлкәһендәге ғилми-тикшеренеүҙәре өсөн, быларҙың һөҙөмтәләре 1946 йыл аҙағында баҫылып сыҡҡан «Кеше тәне өҫтөндә урындағы пластиканың математик нигеҙҙәре» тигән китабында яҙылған.

З) Экономик фәндәр өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Вознесенский Николай Алексеевичка, академик, — 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Ватан һуғышы осоронда СССР-ҙың хәрби экономикаһы» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

И) Хәрби фәндәр өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премия

Гантмахер Феликс Рувимовичкә, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университетенең профессорына, **Левин** Лев Михайловичкә, Н. Е. Жуковский исемендәге Үҙәк аэрогидродинамика институтының өлкән ғилми сотрудникгенә, — тышҡы баллистика өлкәһендә 1947 йылда тамамланған ғилми тикшеренеүҙәре өсөн.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премия

Пугачев Владимир Семеновичкә, артиллерия фәндәре Академияһының член-корреспонденте, Н. Е. Жуковский исемендәге Хәрби-һауа инженерҙәр академияһының профессорына, — баллистика өлкәһендә 1947 йылда тамамланған теоретик тикшеренеүҙәре өсөн.

К) Тарих-филология фәндәре өлкәһендә

200.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Греков** Борис Дмитриевичкә, академик, СССР фәндәр Академияһының Тарих институты директорына, — 1946 йылда баҫылып сыҡҡан «Борондо замандарҙан алып XVII быуатҡа тиклем Русьтә крәҫтиәндәр» тигән ғилми хеҙмәт өсөн.

2. **Державин** Николай Севастьяновичкә, академик, Ленинград государство университете профессорына — славяноведение һәм славяндар тарихе буйынса «Рус халҡының килеп сығыуы», «Борондо заманда славяндар» һәм «Христо Ботев» тигән хеҙмәттәре менән тамамланған күренекле тикшеренеүҙәре өсөн.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Вяткин** Михаил Порфирьевичкә, СССР фәндәр Академияһы Тарих институтының Ленинград бүлегенең өлкән ғилми сотрудникгенә — 1947 йылда баҫылған «Батыр Срым» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

2. **Смирин** Моисей Менделевичкә, СССР фәндәр Академияһы Тарих институтының өлкән ғилми сотрудникгенә, — 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Томас Мюнцерҙең халҡ реформацияһы һәм Бөйөк крәҫтиән һуғышы» тигән ғилми хеҙмәте өсөн.

3. **Гусейнов** Гейдар Наджаф улына, Азербайжан ССР-ы фәндәр Академияһының действительный членене, Азербайжан ССР-ы фәндәр Академияһының общественный фәндәр Бүлеге председателенә, **Мирбабаев** Йософ Абас улына, Азербайжан ССР-ы фәндәр Академияһының Тел институты директорына, **Оруджев** Али Гейдар Али Абас улына, шул уҡ институттың һүҙлектәр һәм терминология бүлеге мөдиренә, — 1940—1946 йылдарҙа баҫылып сыҡҡан «Тулы рус-азербайжан һүҙлеге» тигән хеҙмәт өсөн.

4. **Данилевский** Виктор Васильевичкә, Ленинград политехника институтының профессорына, — рус техникаһының тарихе өлкәһендә тикшеренеүҙәре өсөн, һөҙөмтәләре 1947 йылда баҫылып сыҡҡан «Рус техникаһы» тигән ғилми хеҙмәттә дөйөмләштерелгән.

5. **Бертельс** Евгений Эдуардовичкә, СССР фәндәр Академияһының член-корреспонденте, СССР фәндәр Академияһы Востоковедение институтының өлкән ғилми сотрудникгенә, Али-Заде Абдул Керим Рустам Али улына, Азербайжан ССР-ы фәндәр Академияһының А. Бакиханов исемендәге Тарих институты директорына, — Низами Гәнжәүиҙең «Шәрәф-нәмә»һенә 1947 йылда баҫылып сыҡҡан ғилми критик тексы өсөн.

Башкорт АССР-ының бөтә колхоздарын һәм МТС-тарын электрификациялауҙы кыҫка срокта тормошка ашырырға!

Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы эшселәренең, инженер-техник работниктәренең һәм хеҙмәткәрҙәренең БАССР промышленность предприятиеләрендәге бөтә работниктәргә МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре, Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында булһын, шулай уҡ һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ йылдарында ла беҙҙең Тыуған илебеҙҙең алдынғы коллективтәре сафында баралар. Завод 1947 йыл планын 105,8 процентҡа үтәне һәм государствоға планданы тыш 17 миллиондан артыҡ файҙа бирҙе. 1947 йылда беҙ 12,5 процент йыллыҡ энергияһына, 6,5 процент электр энергияһына экономия яһаныҡ, нефть продуктыларының юғалыуын 2,9 процентҡа кәметтек. Заводтың уйлап сығарыусылары һәм рационализаторҙары күп кенә тәҡдимдәр индерҙеләр. Был тәҡдимдәр йылына дөйөм алғанда 5,5 миллион һумға экономия яһайҙар. Завод 18.000 квадрат метр торлаҡ майҙанына капиталь ремонт үткәрҙе. 1948 йылдың беренсе кварталында завод үҫә барған темптар менән эшләне һәм квартал планын 102,9 процентҡа үтәне. Завод үҙ эшенең һан һәм сифат күрһәткестәренең артабан үҫешен күҙҙә тотоусы һәм торлаҡ поселкаларын төҙөкләндереү һәм торлаҡ майҙанын ремонтлау буйынса ҙур йөкләмәләр алды. Бер үк ваҡытта беҙҙең заводтың шефҡа алынған МТС-тарға квалификациялы эшселәр ебәреү һәм запас частәр әҙерләү юлы менән республикабыҙҙың ауыл хужалығын электрлаштереүгә ҙур ярҙам күрһәтте.

СССР халыҡ хужалығын тергеҙеү һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы тураһындағы закон түбәндәге бурыстарҙы ҡуя: «Колхоздарҙың, МТС-тарҙың һәм совхоздарҙың артабан үҫешен тәьмин итергә. Ауылдарҙа бәләкәй гидростанциялар төҙөлөп, ... ауыл хужалығында электр энергияһын ҡулланыу киңәйтелергә, газогенератор двигателе менән эшләй торған электростанциялар төҙөлөргә тейеш».

Ауыл хужалығын электрификациялау һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың иң мөһим хужалык-политик бурыстарының береһе булып тора. Электрификация ауыл хужалығы производствоһын тағы ла юғарыраҡ кимәлгә күтәрергә мөмкинлек бирә.

Башкорт АССР-ында яңы биш йыллыҡта йөҙҙәрсә ауыл электр станцияларын төҙөү билдәләнә. Ауылды электрификациялауҙың үҫтереү өсөн совет Башкортостанының бөтә мөмкинлектәре бар. Ылығарҙың күп булыуы, торф һәм башҡа төр яғыулыктарҙың байтаҡ уҡ запастары бөтә колхоздарҙы электр энергияһы менән тәьмин итеүгә мөмкинлектәр бирәләр.

Союздың алдынғы өлкәләренең эш тәжрибәләре, күпселек өлөшөндә, был әһәмиәтле эштең уңышлылығы промышленность предприятиеләренең ауыл хужалығын электрлаштереүҙә ҡатнашлыҡ итеүҙәренә ҡарап хәл ителгәнлеген күрһәтә.

Шефтарҙың ярҙамы — кәрәкле һәм бик мөһим эш. Уны артабан әленән-әле киңәйтә барырға кәрәк.

Беҙ, Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре БАССР Министрҙар Советe һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең ҡарарын үтәй барып, 1947 йылда ике колхоз электр станцияһын төҙөп, эксплоатацияға тапшырҙыҡ, шулай уҡ бер МТС-ты тотошо менән электрлаштерҙек. Ағымдағы йылда беҙ Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллығына Кушнаренко районында 25 киловатт ҡеүәтлегендә бер колхоз электр станцияһы, Сталинсе Конституция көнөнә Благовещен районында 50 киловатт ҡеүәтлелегендә бер гидроэлектр станцияһы төҙөргә һәм эксплоатацияға тапшырырға, был станциялар тарафынан хеҙмәтләндерелгән дүрт колхозды тулыһынса электрлаштерергә йөкләмә алабыҙ.

Өфө районының «Парижская коммуна» колхозын электрлаштереүҙе 1948 йылдың июнь айында тамамларға өҫтөбөҙгә алабыҙ.

Йөкләмәләрҙе алған хәлдә беҙ, Ватаныбыҙға һәм иптәш Сталинға бирған вәғәҙәләребеҙҙе уңышлы үтәгән кеүек, был йөкләмәләребеҙҙе лә шулай уҡ уңышлы үтәйәсәгебеҙгә ныҡ ышанабыҙ.

Беҙ Башкортостандың бөтә промышленность предприятиеләре эшселәренә, инженер-техник работниктәренә һәм хеҙмәткәрҙәренә беҙҙең тиңдәштеребеҙ һәм ауыл районларын электрлаштереүҙә тиҙләтеү эштәрен киң йәйелдерергә саҡырабыҙ.

Беҙ Башкорт АССР-ының ауыл эрҙәрендә яңы электр станцияларын төҙөү һәм уларҙы эксплоатацияға тапшырыу һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планын үтәүҙә ... бөтә колхоздар тулыһынса электрлаштерелгән ... торор, ...

Йәшәһен беҙҙең бөйөк Ватаныбыҙ!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе ойоштороусы — Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) партияһы!

Йәшәһен совет халҡының бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин!

Мөрәжәғәт Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы эшселәре, инженер-техник работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәренең дөйөм йыйылышында тикшерелде һәм ҡабул ителде.

ВКП(б) Өлкә Комитетендә

ЛЕНИН ОРДЕНЛЕ ӨФӨ НЕФТЬ ЭШКӘРТЕҮ ЗАВОДЫ ЭШСЕЛӘРЕНЕҢ ҺӘМ ХЕҘМӘТКӘРҘӘРЕНЕҢ РЕСПУБЛИКА КОЛХОЗДАРЫН ҺӘМ МТС-ТАРЫН ЭЛЕКТРИФИКАЦИЯЛАУҒА ЯРҘАМ ИТЕҮ БУЙЫНСА БАШҠОРТ АССР-ы ПРОМЫШЛЕННОСТЬ ПРЕДПРИЯТИЕЛӘРЕНЕҢ БӨТӘ РАБОТНИКТӘРЕНӘ МӨРӘЖӘҒӘТЕ ТУРАҺЫНДА

ВКП(б) Өлкә Комитете бюроһы ҡарар итте:

1. 1948 йылда колхоздарҙы һәм МТС-тарҙы электрификациялауҙа шефлыҡ ярҙамы күрһәтеү буйынса үҙ өҫтәренә конкрет йөкләмәләр алыусы Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы эшселәре, хеҙмәткәрҙәре һәм специалистары коллективының инициативаһын хупларға.

2. ВКП(б)-ның ҡала комитеттәре секретарҙарын: Өфө (иптәш Фоникидзе), Черниковск (иптәш Пашурина), Ишембай (иптәш Джегутанова), Стәрлетамаҡ (иптәш Мораҙахановты), Белорет (иптәш Григорьевте), Октябрьский (иптәш Сарычевте), промышленность предприятиеләре директорҙарын һәм партия ойошмалары секретарҙарын Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәре коллективының йөкләмәләрен киң рәүештә тикшерергә һәм республика ауыл хужалығын электрификациялау буйынса ярҙам күрһәтеү буйынса конкрет йөкләмәләр алыуға ойошторорға мәжбүр итергә.

БАССР Министрҙар Советендә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетендә

Малсылык буйынса күсмә Кыҙыл Байрак Саҡмағош районына бирелде

БАССР Министрҙәр Советe һәм ВКП(б) Өлкә Комитете бюроһы республика колхоздарында 1948 йылдың 4 айында общественный малсылыкты үҫтереү буйынса социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡаранылар.

Ярышта Саҡмағош районы (район Советы исполкомы председателе иптәш Еникеев, ВКП(б) райкомы секретаре Ғәләүетдинов) общественный малсылыкты үҫтереү буйынса социалистик ярышта еңеүсе, тип табылды. Был районға БАССР Министрҙәр Советенең һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Кыҙыл Байрағы ҡалдырылды һәм 10 мең һум күләмендә аҡсалата премия бирелде.

Общественный малсылыкты үҫтереүҙә Балтас һәм Ҡариҙел районларының яҡшы эшләүҙәре билдәләнде.

Нефтселәрҙең йәйге ялы

Көнсығыш нефтселәренең героик хеҙмәтен баһалап, Совет Хөкүмәте, большевиктар партияһы һәм юлбашсыбыҙ Сталин улар тураһында атайҙарса тәрән хәстәрлек күрәләр.

Тик 1948 йыл өсөн генә көнсығыш нефть промышленносе эшселәре профсоюз Үҙәк Комитетенең государство социаль-страхование бюджете ВЦСПС тарафынан 106,3 миллион һум күләмендә раҫланды. Шунан 32.210.000 һумы бюллетень буйынса ваҡытлыса ауырыусыларға, 4.175.000 һумы нефтселәрҙең курорт һәм санаторийҙарҙа дауаланыуҙарына тотола. Былар өсөн 4145 (үткән йылғынан 1745-кә артығыраҡ) путевка алынды. Советтәр Союзы курорт һәм санаторийҙарының бөтә төрҙәренә тип әйтерлек, шул иҫәптән, Ҡырым, Кавказ, Литва, Латвия һәм Эстонияның 35 курортына һәм санаторийҙарына путевкалар бар.

Был курорттарҙа нефть промышленносенең иң яҡшы мастерҙәре, технологтары ял итәсәктәр.

Дауаланыу сроктары, үткән йылғыға ҡарағанда, байтаҡҡа арттырылды.

Башҡортостан нефтселәре 784 путевка аласаҡтар.

Нефтселәрҙең Стәрлетамаҡ ял йорто ял итергә килеүселәрҙе ҡаршы алырға ашығыс әҙерлек алып бара. Быйыл ял йортоноң эшләү осоронда беренсе башлап электр лампалары янды, торлаҡтар ремонтлана, яңы койкалар һәм постелдәр булдырыла, палаталар радиолаштырыла һәм библиотекалар тулыландырыла.

Стәрлетамаҡ һәм Өфө ял йорттарында 1300-гә тиклем нефтселәр ял итәсәк. Шунда уҡ нефтселәр балалары өсөн пионер лагерҙәре асылып, унда 12.500 бала буласаҡ.

Ял итергә барыусыларға материаль ярҙам һәм юл расходтарына 104.000 һум бүлдәләнде. Декрет отпускаһы алыусы эшсе ҡатындарҙы һәм йәш балаларҙы хеҙмәтләндереү буйынса мөһим саралар күрелә.

А. Рыбин,
Көнсығыш нефть промышленносе эшселәре профсоюзы Үҙәк Комитетенең соцстрах инструкторы.

Советтәр Союзында

Бойҙай йыйнау башланды

АШХАБАТ. (ТАСС). Ташауыз өлкәһенән башҡа бөтә өлкәләрҙең колхоздары һәм совхоздарында һуғарыла торған ерҙәрҙә көҙгө арпа урыу эштәре алып барыла. Ашхабат өлкәһендә көҙгө арпа урожайы бөтә майҙандың өстән бер өлөшөндә йыйналып бөттө. Геок-Тепинск районы баҫыуҙарына комбайндар сыҡты. Тиҫтәләгән алдынғы колхоздар арпа сабыуҙы тамамланылар һәм һуға башланылар. Хасан-кули районының Ворошилов исемендәге колхозы көҙгө бойҙайҙы һайлап ура башланы.

Колхоздар тәүгә игенде государствоға тапшыралар. Геок-Тепинск районының Тельман, Орджоникидзе исемендәге һәм «Азат Төркмәнстан» колхоздары иген пунктына өсәр тонна арпа килтерҙеләр. Бахарда һәм Ҡаахкин районларының ауыл хужалығы артелдәре лә иген тапшыра башланылар.

Алтай крайында

Һуңғы көндәрҙә Алтайҙа йылы ямғырҙар яуып үтте. Һауаның торошо сәсеүлектәргә бик яҡшы тәьҫир итә. Ужым ашлыҡтары, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ яҡшы. Крайҙың төньяҡ һәм көнсығыш районларында ужымдар ҡыуаҡлана башланы. Көньяҡ һәм көньяҡ-көнбайыштағы ялан районларҙа ужымдар быуынлана.

Эстония ССР-ҙа 500-ҙән артыҡ халҡ йорто бар. Кистәрен уларҙа крәҫтиәндәр йыйнала. Бында кино-фильмдәр, спектаклдәр, күргәҙмәләр ҡарарға, лекциялар тыңларға, газеталар, журналдар уҡырға, библиотеканан китаптар алырға мөмкин.

Һүрәттә: Рапла Харьюск өйәҙе волосында халҡ йорто.

Г. Акмолинский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Фабрика маркаһында

БАРНАУЛ. (ТАСС). Крахмал, киптән еләк һалынған ыҡсым пакеттәргә, сейә настойкаһы һәм томат тултырылған бутылкаларға матур этикеткалар йәбештерелгән. Был этикеткаларҙа «Алтай крайы, Шипуновск районының Молотов исемендәге колхозы» тигән фабрика маркаһы яҙылған.

Себерҙең был алдынғы колхозы үҙенең емеш һәм йәшелсә баҡсаһынан һәр йыл һайын күп күләмдә емеш, йәшелсә һәм картуф ала. Фермалар күп ит, колхоздың һыу бассейндарә — балыҡ бирәләр. Был продуктыларҙы ҡайтанан эшләү өсөн колхоз 1946 йылда кескенә завод һалды. Ошо ваҡыт эсендә колхоз заводы 5 тоннанан артыҡ крахмал, алма экстракты, емеш кеҫәле, сейә настойкаһы һәм томат эшләп сығарҙы. «Молотов исемендәге колхоз» маркалы продукция потребителдәр тарафынан ҡайнар хупланды.

Ағымдағы йылда завод байтаҡ киңәйтеләсәк.

Ленинградҡа — 245 йыл

ЛЕНИНГРАД, (ТАСС). Нева яры буйына Петропавловск крепосы һалына башлаған көнгә 27 майҙа 245 йыл тулды. Был дата Петербург — Петроград — Ленинградҡа нигеҙ һалынған көн итеп иҫәпләнә.

Ҡаланың Петроград ярында Петр I-ҙең йорто — ҡаланың беҙҙең көндәребеҙгә тиклем һаҡланған боронғо бинаһы — юбилей алдынан халҡ өсөн яңынан асылды. Крепосҡа нигеҙ һалынғас та шунда уҡ төҙөлгән был йорт — ҡала менән йәштәш йорт — һуңынан таш бина эсенә алынды. Һуғышта бер аҙ тиклем зарарланған был йорт яңынан элекке төҫөнә инде. Бында Петр ваҡытындағы мебель, шулай уҡ ҡалаға нигеҙ һалыусының әйберҙәре бар.

Неваның икенсе яры буйындағы Йәйге баҡсаға урынлашҡан Йәйге Дворец — Петр музейе бик күп экскурсанттарҙы үҙенә йәлеп итә. Бында Петербургҡа нигеҙ һалынғандан һуң тәүге йылдарҙың эпохаһы күрһәтелгән.

Ленинградлылар үҙ ҡалаларының юбилейен билдәләйҙәр. Фабрикалар һәм заводтарҙың цехтарында Ленинградтың 245 йыллығы тураһында беседалар үткәрелә. ВКП(б) ҡала комитетенең лекторие был датаға арналған лекциялар уҡый. Тарихселәр һәм архитекторҙар предприятиеләрҙә һәм учреждениеләрҙә докладтар менән сығыш яһайҙар. Культура йорттарында һәм клубтарҙа юбилейға арналған докладтар һәм беседалар үткәрелә.

Партия тормошо

Партия комитеттәренең пленумдарын үткәреүҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөргә

Партияның район һәм ҡала ойошмаларының тормошонда пленумдарҙың отҡан роле ғәйәт ҙур. Пленум етәксе кадрҙарҙы большевистик тәрбиәләү мәктәбе булып тора. Пленум коллегиаль етәкселек органы ул. Бында рабо́тниктәр партияның эске демократияһының принциптәре менән таныштар, коллегиаль етәкселектә, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитте, партия массаһы алдында отчёт биреүҙең әһәмиәтен өйрәнәләр.

Партияның өлкә конференцияһы ҡайһы бер райкомдарҙың пленумдарҙы ВКП(б) Уставы менән билдәләнгән срокта үткәрмәүҙәрен ҡурһәтеп үтте һәм был хатаны тиҙ арала бөтөрөүҙе талап итте. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, күп урында пленумдар әле булһа билдәләнгән срокта үткәрелмәй, уларҙа партия һәм хужалыҡ эшенең мөһим мәсьәләләре ҡуйып тикшерелмәй. Былар иҫәбенә партияның Борай, Өфө һәм Покровка райкомдарын индерергә мөмкин. Был райкомдарҙың секретарҙәре пленумдарҙың тәжрибәләрҙе дөйөмләштереүгә, район партия ойошмаһының тормошондағы мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә һәм билдәләнгән маҡсатҡа өлгәшеү өсөн юнәлеш биреүҙә ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булыуын аңлап етмәйҙәр, күрәһең.

Пленумдарҙы регуляр рәүештә саҡырыу беҙҙең партиябыҙҙың ныҡлы традиция булып тора. Быны оноторға ярамай. Пленумдарҙы үткәреүҙәге етешһеҙлектәрҙе, хаталарҙы бөтөрөргә, уларҙы юғары идея кимәлендә үткәреүгә өлгәшергә кәрәк.

Район һәм ҡала комитеттәренең пленумдарындағы күп етешһеҙлектәрҙең береһе шунан тора: уларҙа тикшерелгән мәсьәләләр партия өлкә ойошмаларының пленумдарында, актив йыйылыштарында тикшерелгән мәсьәләләрҙән бер ҙә айырылмай, партияның район йәки ҡала ойошмаһының үҙенә характерлы мәсьәләләр бик аҙ күтәрелә.

Пленумдарҙа партия комитеттәре членддәренең, түбәнге партия ойошмалары работниктәренең бик аҙы сығыш яһауҙары икенсе һәм киң таралған етешһеҙлек булып тора.

Мәҫәлән, Октябрьск ҡала комитетенең 7 майҙа булып үткән пленумында сығыш яһауҙы 12 кешенән өсөһө генә ҡала комитете члене булды. Бындай ярамаҡыҙ практика партия комитете пленумының ролен һәм уның членддәренең инициативаһын төшөрөүгә килтерә. Былай нормаль булмаған хәлгә артабан юл ҡуйырға ярамай.

Пленумдарҙың юғары идея-политик кимәлдә үтеүҙәренә алдан ныҡлы әҙерлек эштәре алып барыу юлы менән генә өлгәшергә мөмкин. Пленумдарҙа тикшереүгә тулыһынса әҙер һәм ныҡлап уйланған мәсьәләләр генә ҡуйылырға тейеш. Әҙерләнгән мәсьәлә, партия комитете членддәре тарафынан индерелгән ҡиммәтле тәҡдимдәр менән тулыландырылғандан һуңында, пленумда маҡсатҡа юнәлешле ҡарар ҡабул итергә һәм уны уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыуға мөмкинлек бирә.

Пленумда яһаласаҡ докладты әҙерләүгә айырыуса ныҡлы иғтибар бирергә кәрәк. Доклад ҡала йәки район партия ойошмаһының үҙенең тормошонан алынған конкрет миҫалдар нигеҙендә төҙәлергә, уларҙы дөйөмләштерергә һәм политик юнәлеш бирергә тейеш.

Партия комитете, политик етәкселек органы булараҡ, тикшерелгән һәр бер мәсьәләгә партия позицияһынан сығып, яҡын килергә тейеш. Мәсьәләне пленумда тикшергәндә, уны хәл итеү буйынса партия ойошмаһының бурысын билдәләргә һәм кадрҙарға дөрөҫ юнәлеш бирергә кәрәк.

Партия комитеттәре, беренсе нәүбәттә уларҙың секретарҙәре, эштәге етешһеҙлектәрҙе тәнҡитләү эшен киң йәйелдереү сараһын күрергә тейештәр. Насар эшләүсе ойошмалар ғына түгел, беренсе нәүбәттә ул етешһеҙлектәргә юл ҡуйыусы етәкселәр ҡаты тәнҡиткә алынырға тейеш.

Партия комитеттәренең бурысы пленумдарҙы үткәреү срогы турағында ВКП(б) Уставын боҙоуҙарҙы тулыһынса һәм аҙағына тиклем бөтөрөүҙән тора. Пленумдарҙа партия һәм хужалыҡ эшенең, хеҙмәтсәндәр араһында политик һәм идеологик эштәрҙең мөһим мәсьәләләрен тикшерергә һәм пленумдарҙың идея-политик кимәлен юғары күтәрергә кәрәк.

Пленумдарҙы үткәреүҙәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү, партия ойошмаларында ойоштороу-партия эше, шулай уҡ партияның эске эштәренең кимәлен күтәреүгә, партия ойошмаларының ысын мәғәнәлә политик етәкселек органына әүерелдереүгә ярҙам итәсәк.

Х. Ҡорбанғолов,

ВКП(б) Өлкә Комитетенең ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге мөдире.

Звеноларҙа коммунистәр

«Яңы ауыл» колхозының партия ойошмаһы коммунистәрҙе юғары урожай өсөн көрәштең хәл иткес участкаларына — звеноларға беркетте.

— Һеҙ, — тине партия ойошмаһы секретаре иптәш Ишморатов, — звеноларҙа партия ҡарарҙарын үтәүҙе тәьмин итергә тейешһегеҙ. Был яуаплы эштә намыҫ менән эшләгеҙ!

Коммунистәр хәҙер звеноларҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, дисциплинаны ныҡытыу буйынса ҙур ғына эштәр башҡарҙылар. Коммунист Сафиханов звеноһы ер ҡарҙан асылыу менән уҡ баҫыуға сыҡты һәм 8 майға иртә культуралар сәсеүҙе тамамланы. Коммунистәрҙән Бирҙеғолов, Мортазин һәм башҡа иптәштәр үҙҙәренең звеноларында йоштороу-политик эште киң йәйелдереп, сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә тамамлауҙы тәьмин иттеләр.

Коммунистәр баҫыу станында күпып эшләүҙе ойоштороҙлар. Был хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә мөмкинлек бирҙе. Шулай уҡ, политик-массовый эш алып барыу өсөн дә был уңайлы булды. Агитаторҙар политик, хужалыҡ темаларында әҙерлекле беседалар үткәрҙеләр. Үҙ сығыштарын колхоздың һәм һәр бер звеноның эшен тормошҡа бәйләп алып барҙылар. Алдынғыларҙың эш методтарын популярләштереүгә һәм артта ҡалыусыларҙы тәнҡитләүгә бик ныҡ иғтибар бирелде.

Коммунистәрҙең фиҙакәр хеҙмәте һөҙөмтәһендә «Яңы ауыл» колхозы Стәрлетамаҡ районында алдынғылар сафына баҫты.

Ғ. Ибраһимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Политик-массовый эш яҡшы ҡуйылған урында

Ҡарламан совхозында яҙғы сәсеү эштәре осоронда бөтә политик-массовый эш баҫыуға күсерелде. Агитколлектив составы яҡшы әҙерлекле коммунистәр, ауыл хужалығы специалистәре менән тулыландырылды. Агитаторҙарҙан коммунист Синютенко, агроном Ермилов һәм Петухов иптәштәр һәр көн баҫыуға, трактор агрегаттарында булып, массовый-аңлатыу эштәре алып барҙылар. Беседалар үткәрелә, газета-журналдар уҡыу ойошторола, стена газетаһы һәм «боевой листок»тар сығарыла. Көндәлек эшкә йомғаҡ яһала.

Алдынғы трактор бригадаһы өсөн күсмә Ҡыҙыл Байраҡ һәм трактористар өсөн флажоктар булдырылды. Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ биш көндә бер, а флажоктар һәр көндө социалистик ярышта еңеүселәргә тапшырыла.

Яҡшы ойошторолған политик-массовый эш гүзәл һөҙөмтәләр бирә. Иптәш Махиянов етәкселек иткән трактор бригадаһының трактористәре смена заданиеһен систематик рәүештә 150—200 процентҡа еткереп үтәйҙәр. Был бригада совхоздың күсмә Ҡыҙыл Байрағын сәсеү башланғандан бирле үҙ ҡулында тотоп килә.

С. Ишбулдин.

Өфө туҡыу фабрикаһының иң яҡшы туҡыусыһы Тәзкирә Гәрәева үҙенең эш нормаһын 200 процентҡа тиклем еткереп үтәй. Шишмә районы «Самолет» колхозының элекке члене Т. Гәрәева ФЗО мәктәбен тамамлап, туҡыусы профессияһын алды.

Һүрәттә: Т. Гәрәева эш өҫтөндә.

Л. Якубов фотоһы.

План срогынан алда үтәлде

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Нефть промышленносе предприятиеләрендә стахановсылар хәрәкәте көндән-көн киңәйә бара. Бында хәҙер 6 нефть сығарыу участкаһы, 29 бригада һәм 17 цех тотош стахановсы коллективҡа әйләнде.

Директоры иптәш Стариков булған газ-компрессор хужалығы стахановса эшләп, биш айлыҡ планды 11 майға уҡ үтәне һәм ай аҙағына тиклем пландан тыш 3 мең тоннанан артыҡ газ бирҙе.

Нефть эшкәртеү заводы (директорыВаршавер, партия ойошмаһы секретаре Томилин) май айы планын срогынан алда үтәп, пландан тыш кәрәсин биреүгә өлгәште. Ишморатов бригадаһы ярты йыллыҡ заданиене 4 айҙа үтәне, стахановсы токарь Лосев 1952 йыл иҫәбенә эшләй.

ТӨҘӨҮСЕ ЭШСЕЛӘР АРАҺЫНДА ТӘРБИӘ ЭШЕН КӨСӘЙТЕРГӘ

Начальниге иптәш Наконечный булған төҙәлеш управлениеһенең эшселәре ленинградлылар саҡырыуына ҡушылып, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү йөкләмәһе алғайнылар. Улар алған йөкләмәләрен уңышлы ғына тормошҡа ашырып киләләр. Бигерәк тә телефон аппараттары заводына торлаҡтар төҙөүҙә эшләгән йәш ташсы ҡыҙҙарҙан Р. Хәбибуллина, Ә. Зиннәтуллина, Мостафин, Гордеев, штукатурсыларҙан ҡала Советы депутаты, комсомолка Князева, Липинский, Сомов һәм башҡа иптәштәр юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Улар ағымдағы йылдың дүрт айында яртышар йыллыҡ задание үтәнеләр.

Ләкин нормаларҙы үтәп еткермәүсе эшселәр ҙә юҡ түгел. Быны төп сәбәбе эшселәр араһында политик-тәрбиә эшенең йомшаҡ ҡуйылыуынан килә. Стена газеталары, «боевой листоктар» сығарылмай. Партия ойошмаһы (секретаре иптәш Григорьев), постройком һәм комсомол комитете политик-массовый эште киң ойошторолу, алдынғыларҙың тәжрибәһен таратыу иҫәбендә нормаларҙың һәр бер эшсе-төҙөүсе тарафынан да үтәлеүенә өлгәшергә тейештәр.

И. Чанышев.

Һуңғы культуралар сәсеүҙе тиҙ тамамларға!

Ике колхоз ярышы

«Алға» колхозы «Ря» колхозы менән ярышҡа сыҡҡайны. Ләкин баҫыу эштәре башланыу менән, районда беренселекте алыу өсөн ысын мәғәнәлә ярыш Буденный исемендәге колхоз менән башланды.

Ике артелдең дә членддәре социалистик ярыштың көсөркәнешле буласағын яҡшы беләләр ине. Улар алға ҡуйылған бурыстың яуаплы һәм ауыр буласағын яҡшы аңлап, ныҡышмалы эшкә башланылар.

Баҫыу эштәре башланыу алдынан ярышыусы колхоздарҙың партия ойошмалары үҙ йыйылыштарында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, массовый-политик эште киң йәйелдереү мәсьәләләрен ентекләп тикшерҙеләр, партия һәм комсомол көстәрен эштең хәл иткес участкаларына беркеттеләр.

Бына яҙғы сәсеү башланды һәм һөрөү, сәсеүҙең графиген көндән-көнгә үтәү өсөн социалистик ярыш бөтә киңлеге менән йәйелдерелде. Районда беренселек өсөн көсөркәнешле көрәш 20 көн дауам итте. Уҡытыусылыҡ эше күп ваҡытын алыуға ҡарамаҫтан, партия ойошмаһы секретаре иптәш Хафизов һәр көн эш өҫтөндә булды, төнөн һөрөүсе, сәсеүсе һәм тырмасылар менән бергә үткәрҙе, газеталар уҡыны, беседалар үткәрҙе, уларҙы Советтар Союзының эске һәм тышҡы хәле менән таныштырҙы.

Бөтә эш баҫыуға күсерелде. Кисәләр баҫыуҙа эшләнелер, баҫыуҙа ял иттеләр һәм агитаторҙарҙың сығыштарын тыңланылар. Эш иртәнге 4 сәғәттә үк башланып, кискә 10—11 сәғәттә генә туҡталды.

Һәр биш көн һайын эшкә йомғаҡ яһалды. Ярышыусы колхоздар, Иғлин районының 54 колхозы араһында, биш көн һайын 1—2-се урынды алып килделәр. Ярыш бигерәк тә май айының урталарында көсөркәнешле төҫ алды. Өсөнсө биш көнлөктә район Советы башҡарма комитеты һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы Буденный исемендәге колхозға бирелде. Ә «Алға» колхозы икенсе урынға ҡалды.

Был хәбәрҙе ишеткәс, колхоз председателе Хәсәнов һәм партия ойошмаһы секретаре Хафизов иптәштәр һөрөүсе, сәсеүсе һәм тырмасылар менән кәңәшләштеләр. Алдағы биш көнлөктә Ҡыҙыл Байраҡты нисек кенә булһа ла яулап алыу төп бурыс итеп ҡуйылды.

20 майға «Алға» колхозы ысынлап да беренсе урынды алыуға өлгәште. Был колхоз график менән билдәләнгән срокҡа — 25 майҙа яҙғы сәсеүҙе тамамланы. Хәҙер ике колхоз араһында пландан тыш ашлыҡ сәсеү өсөн ярыш башланды.

Ә. Ҡамаев.

Ни өсөн тракторҙар төндә эшләмәйҙәр?

«СХТЗ» тракторының баҫыуға сыҡҡандан бирле төндә эшләмәүенә асыуы ҡабарып йөрөгән колхоз председателе иптәш Фәйзуллин түҙмәне, ҡараңғы төшөр алдынан тағы ла трактористар эргәһенә килде.

— Ни өсөн төндә эшләмәйһегеҙ, егеттәр?

— Ҡараңғы, ут юҡ, — тип яуап бирҙеләр трактористар бик тыныс ҡына.

— Ошо бер нисә көн эсендә был ерҙәрҙә сәсеү үткәрмәһәк, ер кибәсәк һәм был колхоз өсөн дә, шулай уҡ МТС өсөн дә бик ҡиммәткә төшәсәк, — тине председатель.

— Ҡараңғыла сей ҡалдырып, ярлы-бирле һөргәнсе, тик ултырыу яҡшыраҡ, — тип трактор бригадаһы бригадиры иптәш Йосопов трактористәрҙең һүҙен ҡеүәтләп ҡуйҙы.

Ворошилов исемендәге колхоз председателе иптәш Фәйзуллин икенсе-өсөнсө көндө лә трактористар эргәһендә булды, тракторҙарҙың төнгө сменала эшләмәүҙәре турағында МТС етәкселәренә лә хәбәр итте. Ләкин бер кемдән дә ярҙам ала алманы.

Быңдай фактыларҙы Усть-Икин МТС-ы хеҙмәтләндергән бөтә колхоздарҙа ла, тип әйтерлек осрап була. 47 тракторҙың 35-е яҡтылыҡ булмағанлыҡтан төндә эшләмәй. Ә 35 трактор менән төнгө сменала 140 гектар ер һөрөп булыр ине.

Ләкин МТС директоры иптәш Соловьев та һәм өлкән механик иптәш Фәхретдинов та:

— Хәҙер тракторҙарҙы яҡтылыҡ менән тәьмин итеү турағында һөйләү бик һуң, был ҙур эште башҡарып сығырға беҙҙең көсөбөҙҙән килмәй, — тиҙәр.

Мәсәтле МТС-ында ла (директоры иптәш Перомонов) тракторҙарҙың төнгө эшенә тейешле иғтибар бирмәйҙәр. Трактористар телмәләр төндә эшләйҙәр, теләмәһәләр юҡ. МТС етәкселәре трактор бригадаларынан төнгө смена нормаһын үтәүҙе талап итмәйҙәр.

И. Ғәлимов.

М. Белан.

Алдынғы совхоздарҙа

Республикабыҙҙа бөртөкле ашлыҡ тресы совхоздары яҙғы сәсеү планын 25 майға 87,5 процентҡа, ә һөтсөлөк-суҡасылыҡ тресы совхоздары 90,8 процентҡа үтәнеләр. Йылайыр, Туймазы, Аллағуз, «Спартак» совхоздарында пландан тыш байтаҡ ашлыҡ сәселде. Шулай уҡ Байрамғол, Лағыр, Ҡарламан һәм БашЦИК исемендәге совхоздар ҙа сәсеүҙе тамамланылар.

Башҡортостан совхоздары быйыл яҙғы сәсеүҙең агротехника талаптарын тулы үткәрҙеләр. Сәсеүҙең бөтә этаптарында ла эш сифаты ҡәнәғәтләнерлек булды. Ҡаҙанғол, Әлшәй, Йылайыр, Раевка, Арыҫлан, Моратал һәм «8 март» совхоздарында ерҙе икешәр ҡат культивациялау киң рәүештә ҡулланылды.

Совхоздарҙа юғары урожай алыу өсөн социалистик ярыш звенолар араһында ғына түгел, бәлки бүлексәләр һәм совхоздар араһында ла киң йәйелдерелде. Яҙғы сәсеү барышында ярышыусы механизаторҙар юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәттеләр.

Ҡарламан совхозында тракторист Биктимирова тракторҙың яҙғы баҫыу эше планын 354 процентҡа, Бәширов 148, Кузнецова 306 процентҡа үтәне.

З. Шәрәфетдинов.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләйҙәр

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Быйыл 645 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәскән «Яңы таң» колхозы (председателе иптәш Шәфиков) бойҙай сәсеүлектәрен өҫтәмә аҙыҡландырыуҙы башланы. Зөбәржәт Шәүәлиева етәкселек иткән алдынғы звено үҙ участкаһындағы баҫыуҙарҙа ҡый үләндәренә ҡаршы көрәште йәйелдерҙе. Инде 22 гектар бойҙай уталды.

— Быйыл ашлыҡтарҙың сығышы яҡшы, — ти полевод Ғәмәр Батыршин. — Тупраҡ дымлы, яҡшы эшкәртелде. Баҫыуҙар таҙа.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше районың башҡа колхоздарында ла бара. «Кооператив № 1», «Ҡарлыған ҡыуаҡ» һәм башҡа колхоздарҙағы звенолар һайлап утау эштәрен ойошторҙолар.

Р. Ҡамалов.

Тракторҙар пар һөрәләр

ЯЗЫКОВО. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). БашЦИК исемендәге совхоз (директоры иптәш Калачев, партия ойошмаһы секретаре иптәш Үтәшев) һабан ашлыҡ культуралары сәсеү планын 105 процентҡа үтәне. Бында 4 мең 170 гектар бойҙай сәселде.

Совхоздың тракторҙары хәҙер пар күтәрәләр. Механизаторҙар 2 мең 140 гектар майҙанда пар һөрөүҙе 3 июнгә тамамлау өсөн көрәшәләр. Тракторист Сафонов, Ямиев, Мельников, Ярославцев иптәштәр «С—80» тракторында смена нормаһын 160 процентҡа үтәйҙәр.

Ғ. Идрисов.

Вәғәҙәне үтәйҙәр

МАЛАЯЗ. (Телефон аша). Салауат районының колхозсылары бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинга яҙған хатта алған йөкләмәләрен намыҫ менән үтәйҙәр.

35 колхоз сәсеүҙе тулыһынса тамамланы. «Новая жизнь», «Партизан Морза», «Эй» колхоздары сәсеүҙе иң ҡыҫҡа сроктарҙа, яҡшы сифатлы итеп үткәрҙеләр һәм пландан тыш 40—50-шәр гектар бойҙай сәстеләр.

Районың бөтә колхоздарында ла сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн ныҡлы көрәш бара.

З. Вәлиев.

Алдынғы колхоздар арттағыларға ярҙамға сыҡтылар

ҠАНДРА. (Телеф. аша). Алдынғы колхоздар береһе артынан икенсеһе сәсеүҙе тамамлау турағында район ойошмаларына рапорт бирәләр.

«Ҡыҙыл балыҡсы», «Алмаш», «Ҡайың күл», «Ҡандра Ҡотой», «Безбожник» һәм Чапаев исемендәге колхоздар сәсеүҙе тулыһынса тамамланылар.

«Безбожник» колхозы членддәре хәҙер күршеләге «Ҡыҙыл маяҡ» колхозына ярҙамға сыҡтылар. Был колхозда уларҙың 8 эш аты һәм 12 үгеҙе эшләй.

Ошо ярҙам арҡаһында был колхозда һуңғы көндәрҙә сәсеү темпы байтаҡ күтәрелде.

С. Зәйруллин.

Агрономдың һүҙе—авторитетле һүҙ

«Марс» колхозында бойҙай сәсеү тамамлағас, ниндәй ҡолаҡтарҙан ишетелгән һүҙ буйынсалыр инде, район үҙәгендә бәхәс күтәрелде: эштең сифаты ҡәнәғәтләнерлекме, түгелме? Район Советында бойҙайҙың тырматылмаған участкаға сәселеүе турағында барҙы һүҙ. Прокурорға иһә, ерҙең бик насар һөрөлөүен әйтеп, уның үҙенең шул колхозға барып сығыуы яҡшыраҡ булыуын белдереп ҡуйҙылар. ВКП(б) райкомы секретаре Ғүмәров, имеш-мимеш хәбәрҙәрҙең береһе лә төплө булмағанлыҡтан, ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы Фәрхиевте саҡыртып аңлатма һораны:

— Ул колхозда берәрегеҙҙең булғаны бармы?

— Участка агрономы Вакиева кисә генә шунда барып ҡайтҡан. Ләкин ул уны-быны әйтмәне...

Бойҙай сәселгән ерҙең сифатын билдәләр өсөн специалист булыу кәрәк түгел ине. 4 гектарҙан артыҡ участканы — үҙған көҙ ҡар төшөр алдынан ғына насар һөрөлгәнлектән бракҡа сығарылған ерҙе — ҡайтанан һөрөп, тырматып та тормаһынса, шунда ҡул менән бойҙай һибеп сыҡҡандар икән. Ерҙең үҙған көҙҙә һөрөлгән йәки тырматылған булыуына ла ышанырлыҡ түгел ине: һарут үләндәре гөрләп үҫеп ултыра.

Был ерҙе ҡайтанан эшкәртергә ҡушып, һуңынан агроном Вакиева менән һөйләшкәс, мәсьәлә асыҡланды.

— Мин колхоз председателенә әйтеп ҡараным, — тип яуап бирҙе Вакиева. — Минең һүҙҙе һанға һуғыусы бармы ни?

— Ә ниңә был турала ауыл хужалығы бүлегенә белдермәнең? — тинеләр Вакиеваға. Яуап күнелде йыуатырлыҡ булманы:

— Сәселгән — эше бөткәйне бит инде.

Вакиеваға ғына түгел, ә районда эшләүсе бөтә агрономдарға ла үҙҙәренең агрономлыҡ бурыстарын нисек намыҫ менән үтәргә кәрәк икәнлеге турағында һабаҡ бирерлек ваҡиға ине был. Ләкин ауыл хужалығы бүлеге етәкселәре бынан бер төрлө лә һығымта яһаманылар. Сөнки агрономдарҙың яҙғы сәсеү осоронданы эштәренә аҙмы-күпме иғтибар итеү, уларға юнәлеш биреү бында артыҡ мәшәҡәт булып иҫәпләнә. Сәселгән ерҙе тикшереп ҡабул итеү, агрономдарҙан үҙҙәренең эштәре турағында отчет һорау практикаға индерелмәгән. Шуға күрә улар, кәрәк саҡтарҙа кәңәш биреүсе төҫөндә, әйтергә кәрәк, онотҡанда бер генә, баҫыуҙарға сығып йөрөйҙәр һәм ҡайһы саҡта «гәҙәттән тыш» хәлдәргә тура киләләр.

Әле 23 майҙа район ауыл хужалығы бүлеге агрономы Вәлитов Ишле МТС-ы хеҙмәтләндергән колхоздарҙа йөрөп ҡайтты. «Ҡыҙыл маяҡ» колхозында трактор менән һай ғына итеп һөрөлгәнлектән ҡаҫтаре лә аҡтарылмаған 10 гектарлыҡ участканы ла күрмәне ул. Ләкин «Яңы булаҡ» колхозының оло юл буйындағы бойҙай ере уның иғтибарын йәлеп итте. Күҙҙе йомоп үтеп китерлек түгел ине һәм шуға күрә Вәлитов туҡталып ерҙе ҡараны. Һөрөүҙең тәрәнлеге 8—10 сантиметр. Вәлитов колхоз председателен саҡыртты һәм ер башынан ары китмәйенсә, сама менән генә акт төҙөнө: «0,90 гектарлыҡ участканың сифаты насар».

Агроном, бер урында насар эшләгән кешеләрҙең икенсе участкала ла үҙ намыҫтарына тап төшөрөүҙәренән тартынмауҙары турағында уйларға һәм тейешле һығымталарҙы яһап, колхоз хужалығына ярҙам күрһәтергә тейеш ине. Вәлитов улай итмәне: акт яҙылған ҡағыҙ кеҫәгең кеҫәһенә һалып, ашығыс рәүештә район үҙәгенә ҡайтып китте һәм, бик ҙур эш емергән кеше кеүек, үҙенең «табышы» менән маҡтанып йөрөнө. Ләкин уға ҡарап «Яңы булаҡ» колхозында насар һөрөлгән ерҙе ҡайтанан эшкәртергә ашыҡманылар.

МТС агрономдарының яҙғы сәсеү осорондағы эшмәкәрлеге турағында ла йыуаныслы һүҙ әйтерлек түгел. Улар ашлыҡ сәсеүҙә агротехниканың элементар ҡағиҙәләрен һаҡлауға ла иғтибар итмәйҙәр. «Яңы юл» колхозында бөтә майҙанда ла сәсеүҙе трактор агрегаты менән башҡарырға мөмкинлек була тороп та, Ишле МТС-ының өлкән агрономы Мәхмүтовтың күҙ алдында, колхоз председателе Кәримов машинаны туҡтатып, бойҙайҙы ҡул менән сәстерә.

Боҙаяҙ районында агрономдар үҙҙәренең изге бурыстарын үтәүҙән ситтә торалар. Улар агротехника ҡағиҙәләрен үтәүҙе талап итмәйҙәр. Район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы күҙҙәрен дә йоммай әйтеп тора:

— Беҙҙең агрономдарҙың һүҙҙәрен һанға һуҡмайҙар, һәр колхоз үҙе белгәнсә эшләй бирә, — ти.

Быңдай хәлгә сик ҡуйырға бик ваҡыт. Баҫыу эштәренең был яуаплы этабындағы агрономдың һүҙе — авторитетле һүҙ булһын.

Е. Әхмәтшин.

Сит илдәрҙән телеграммалар

ЧЕХОСЛОВАКИЯЛА ЗАКОНДАР СЫҒАРЫУСЫ МИЛЛИ СОБРАНИЕГӘ ҺАЙЛАУҘАР

ПРАГА, 30 май. (ТАСС). Бөгөн Чехословакияла Закондар сығарыусы Милли Собраниеға һайлауҙар үткәрелә. Иртәнге сәғәт 8-ҙә меңәрләгән һайлау участкаларының ишектәре асылды. Законда күҙҙә тотолған срокта, иртәнге таң сәғәт 8-ҙә бөтә урында ла тауыш биреү башланды.

Закондар сығарыусы Милли Собраниеға һайлауҙар киң массаларҙың политик һәм хеҙмәт күтәренкелеге обстановкаһында үтә. Прагала, уға яҡын булған ауылдарҙа — бөтә урында ла парламентҡа һайлауҙар ойошҡан, ирекле һәм ысын демократик рәүештә үтәләр.

Общественный биналарҙа, йорттарҙа — һайлаусыларҙы милли фронттың берҙәм кандидаттары исемлеге өсөн, яңы хөкүмәт политикаһы өсөн, халыҡ-демократик республикаһы өсөн тауыш бирергә саҡырыусы лозунгылар эленгән. Бында бер генә урында ла ғәскәрҙәр ҙә һәм полиция ла күренмәй. Ошо яғы менән ул күп кенә көнбайыш илдәрҙә бындай көндәрҙә була торған хәлдән айырылып тора.

Бөтә политик партиялар вәкилдәренән торған һайлау комиссиялары яҡшы һәм ойошҡан рәүештә эшләйҙәр. Һайлаусылар алдан уҡ бюллетендәр — милли фронт кандидаттары исемлеген һәм милли фронт исемлегенә риза булмағанлығын белдереү өсөн аҡ бюллетень алдылар.

Үҙәк һайлау комиссияһына Братиславанан, Брнонан, Кладнонан, Моравский Остраванан һәм илдәге башҡа промышленность һәм административ үҙәктәренән килгән мәғлүмәттәргә ҡарағанда, бөтә урында ла һайлаусылар тыныс һәм ысын ирекле обстановкала тауыш бирәләр. Бөтә урында ла һайлаусыларҙың юғары активлеге күренә. Көндөҙгө сәғәт 12-гә алынған тәүге мәғлүмәттәргә ҡарағанда, күпселек һайлаусылар тауыш биргәндәр, ә күп кенә һайлау участкаларында һайлаусыларҙың 100 проценте тауыш биргән.

Парламентҡа һайлауҙар ваҡытында Прагаға бик күп һанда сит ил журналистары килде. Уларҙың күпселеге, һайлау участкаларында булғандан һуң, Чехословакиялағы һайлауҙар ысын ирекле, демократик һәм халыҡ һайлауҙары булып тора, тип белдерәләр.

Һайлауҙар тураһындағы тәүге мәғлүмәттәр бөгөн кис алынасаҡ. Иң һуңғы мәғлүмәттәр 31 май иртән көтөлә.

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

ТЕЛЬ-АВИВ, 28 май. (ТАСС). Тель-Авив радиоһы үҙенең ҡыҫҡа тапшырыуында «иҫке Иерусалим ҡалаһының еврей кварталын һаҡлаусы төркөмдөң һуғыш припастары һәм аҙыҡ-түлек запастары бөткәндән һуң, бөгөн ғәрәп ғәскәрҙәре уларҙы еңделәр, үлеүселәр һәм яраланыусылар һаны күп артты», тип белдерҙе.

Тель-Авив радиоһы, яңы Иерусалим ҡалаһы өсөн һуғыш дауам итә тип өҫтәй.

Иминселек Советендә

НЬЮ-ЙОРК, 27 май. (ТАСС). Иминселек Советы үҙенең кисә иртәнге ултырышында Индия-Пакистан бәхәсен һәм «Чехословакия мәсьәләһе» тип аталған мәсьәләне тикшерҙе.

Һөҙөмтәһеҙ бәхәсләшеүҙәрҙән һуң Индия-Пакистан мәсьәләһен тикшереү кисектерелде.

«Чехословакия мәсьәләһен» тикшергән ваҡытта Англия вәкиле Кадоган, иҫбатлауҙар алыу өсөн подкомиссия төҙөү тураһында 24 майҙа Чили тәҡдимен кире ҡаҡҡанда Громыконың «икеләтә вето» ҡулланыуына «ғәжәпләнгәнлеген» белдерҙе. Аргентина вәкиле Арсе экспертҡар комиссияһы «Чехословакия мәсьәләһе» буйынса дәлилдәр йыйнаһын, тигән Аргентинаның яңы тәҡдименең ҡабул ителеүен ныҡышмалы рәүештә талап итте.

Шунан һуң Громыко үҙенең ҙур белдереүендә, Аргентина резолюцияһы Чехословакияла кисек кенә булһа ла тикшереү үткәрергә өлгәшеүгә яңынан ынтылыш булып тора, тине. Аргентина резолюцияһы Чили резолюцияһынан бары тик шуның менән генә айырыла: Аргентина резолюцияһы буйынса тикшереүҙе өс держанан торған подкомиссия урынына 11 держанан торған экспертҡар комитеты үткәрергә тейеш. Громыко тикшереү үткәреү тәртибе тураһындағы пункт Аргентинаның яңы тәҡдименең төп сифаты булып тора, ләкин совет делегацияһы быныһы менән килешә алмай, тип айырыуса билдәләне. Был демагогик раҫлауҙар [illegible] Англияның Ҡушма Штаттар эҙе буйынса барыуы яҡшы билдәле, тип дауам итте Громыко. Чехословакияның бойондороҡһоҙ политикаһын емереүгә иҫәп тотолған Американың ҡайһы бер түңәрәктарының пландары тулыһынса уңышһыҙлыҡҡа осрағандан һуң да Ҡушма Штаттар сит илдәрҙең эске эштәренә тығылыу пландарын эшләүҙе дауам итерҙе. Громыко тикшереү тураһында ҡабул ителгән тәҡдимдәр Берләшкән милләттәр ойошмаһының авторитетын төшөрөрҙәр ине, тип ләрән ышанғанлығын белдерҙе.

Англия вәкиле Кадогандың Громыко «икеләтә вето» ҡулланып файҙаланды, тигән раҫлауын кире ҡағып, Громыко Англия вәкиле 5 держаның Сан-Францискола ҡабул ителгән декларацияның асылын боҙҙо, тип белдерҙе. Әгәр ҙә Аргентинаның яңы тәҡдиме лә тикшереүгә килтермәһә, был тәҡдим аҙаҡ сиктә, тағы ла бер кисә вето ҡуйҙыртыу маҡсатын тотасаҡ икәнлеге асыҡ. «Был вето артынан ҡыуыу», — тине Громыко.

Һөҙөмтәләү һүҙе итеп Громыко, Чехословакия менән Советтар Союзы араһындағы дуҫлыҡ, кемгә лә булһа оҡшаймы йәки оҡшамаймы икәнлегенә ҡарамаҫтан, дауам итәсәк, тип белдерҙе. Бындай дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре Чехословакия һәм Советтар Союзы халыҡтары интересында ғына түгел, бәлки халыҡ-ара тыныслыҡ интерестарында лә төп урынды ала.

Шунан һуң Совет Палестина мәсьәләһен тикшерә башланы. Тикшереү бер ниндәй ҙә һөҙөмтә бирмәне. Ғәрәп государстволары вәкилдәре һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу тураһында Иминселек Советының 22 май резолюцияһында яҙылған тәҡдим менән ризалашыуҙан баш тарттылар.

Еврей агентствоһы вәкиле Эбан, [illegible]

Шунан һуң Совет үҙ вәкилдәренә үҙҙәренең хөкүмәттәре менән консультация үткәрергә мөмкинлек биреү өсөн, Советтар Союзы вәкиле Громыконың һәм АҠШ вәкиле Остиндың ризалығы менән, был мәсьәләне тикшереүҙе 27 майҙағы киске ултырышҡа тиклем кисектерергә ҡарар ҡабул итте.

Макдермоттың белдереүе

ВАШИНГТОН, 28 май. (ТАСС). АҠШ Государство департаменты вәкиле Макдермотт хәбәрсе менән булған беседаһында, 26 майҙа Государство департаменты Американың Бейруттағы посланниге Пинкертонға Америка судноһы «Мэрин карпэтэн» төшөрөлгән 41 американыны тотоп алыуға ҡаршы АҠШ-тың икенсе протесын Ливан хөкүмәтенә тапшырырға тәҡдим итте, тип белдерҙе.

Макдермотт шулай уҡ, Ливан һәм Египет АҠШ-тың ноталарына әлегә тиклем яуап бирмәнеләр, тип белдерҙе. Был ноталарҙа, АҠШ Палестина яр буйҙарына ошо илдәр тарафынан иғлан ителгән блокаданы танымай, тип белдерелә. Төрлө һорауҙарға яуап биреп, Макдермотт, үҙендә Англияның ғәрәптәргә ярҙам күрһәтеү өсөн Америка средстволарын ниндәй күләмдәргә файҙаланыуына ҡарата информация булмағанлығын раҫланы. Макдермотт хәҙерге ваҡытта Америка илсеһе Дуглас менән Англия сит ил эштәре министры Бевин араһында Палестина мәсьәләһе буйынса Лондонда бара торған һөйләшеүҙәргә ҡарата нимә булһа ла белдереүҙән баш тартты.

Урамдарҙы асфальтлауға әҙерләйҙәр

Өфө ҡала Советы исполкомының һәм ВКП(б) ҡала комитетының тыуған ҡалабыҙҙы төҙөкләндереүгә саҡырған мөрәжәғәте хеҙмәтсәндәр араһында ҙур отклик тапты.

Киров районындағы предприятиеларҙа, учреждениеларҙа эшләүсе эшселәр, инженер-техник работниктар һәм хеҙмәткәрҙәр үҙ райондарындағы урамдарҙы тигеҙләп, асфальтлауға әҙерләйҙәр.

Туҡай урамында төҙөкләндереү эшендә республика прокуратураһы, юстиция Министерствоһы, Башглавсул коллективтары, Крупская урамында АТС, почта связь управлениеһы һәм башҡа учреждениеларҙың һәм предприятиеларҙың коллективтары ҡатнашалар. Туҡай урамында поликлиникаға ҡаршы участкала урамды асфальтлауға һәм газондар яһауға әҙерлек эше 4 көн эсендә тамамланды. Крупская урамындағы участкала район Советы депутаты иптәш Колесов етәкселегендәге группа ике кварталда урамды тигеҙләү эшен башҡарҙы. Группа тәүге өс көн эсендә 250 хеҙмәт көнө эшләне.

С. Дәүләтшин.

Һалсылар төҙөлөштәргә ағас оҙаталар

Республиканың йылғаларында һаллаусыларҙың һәм һалсыларҙың ҡыҙыу эштәре бара. Улар ҡыш әҙерләнгән һәм йылға буйҙарына ташылған ағастарҙы йылғаларға төшөрәләр, һаллайҙар, ә һалланғандарын төҙөлөштәргә оҙаталар. Төй һәм Сарс йылғалары буйлап Уразбахты һал ағыҙыу контораһы запанына ағас килә башланы. Бында һаллауҙа ике автомашина, 600-ҙән артыҡ кеше эшләйәсәк. Һаллаусылар һал ағыҙыуҙы срогынан 15 көн алда тамамларға йөкләмә алдылар. 2.600 кубометр ағас һалланды.

Булмаҙы участкаһы төҙөлөштәргә ун ете мең кубометр ағас һаллап ағыҙырға тейеш. Участкала бер мең 300 кубометр ағас һалланды. Күптән түгел генә «Барнаул», «Леваневский» пароходтары бында ҡыш һалланған дүрт мең ярым кубометр ағасты буксирға тағып, Өфөгә алып китте.

* * *

Асҡын леспромхозының Өршәде урман участкаһы быйыл утыҙ мең кубометр ағас оҙатырға тейеш. 15 майҙан алып Күнгәк, Сарс йылғаларына ағастар төшөрөлә башланы. Ҡыуғында эшләүсе 200 кеше тәүге өс көндә йылғаларға ун өс мең кубометр ағас төшөрҙө.

Һалсылар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелә. Эшселәрҙең күпселеге нормаларын байтаҡ арттырып үтәй. 80 йәшлек Роман Сидухин 30 кубометр урынына 40-ар, Идкат Лотфуллин, Әхмәт Исхаков, Әхсәновтар 70—80-шәр кубометр ағас төшөрәләр.

Республиканың башҡалаһы — Өфөнө төҙөкләндереү
Һүрәттә: Советская урамын асфальтлауҙан бер күренеш.
В. Жданов фотоһы.

Директорҙың ҡабул итеү бүлмәһендә

Сәғәт 11 тулырға 20 минут ҡалып килә. Клиенттар коридорға ҡараған ике кескәй тәҙрә эргәһенә йыйылғандар. Ошо тәҙрәләрҙең береһенән ир кеше тауышы килә:

— Гражданка, ҡалай инде һеҙ? Әгәр утҡа аҙыраҡ түләйек тиһәгеҙ, счетчик алып ҡуйығыҙ!

— Бәй, улай булғас, миңә счетчик ҡуйығыҙ, бик әйбәт булыр.

Был «бәйләнсек клиент» начальниктың йөҙәткән ахрыһы. Эстәге ир кеше тауышы ҡалыная төштө.

— Беҙҙә счетчик юҡ, кәрәк булһа табып ҡуйығыҙ.

— Бына бит һеҙ үҙегеҙ үк яҙып ҡуйғанһығыҙ, «әгәр ҙә квартирала кәмендә 5 лампа янһа, счетчикте «Энергосбыт» ҡуя» тип. Мин яҙмаған бит уны, һеҙ яҙғанһығыҙ...

Начальниктың бүтәнсә тауышы ишетелмәне. Беҙ үҙ йомошобоҙ менән халыҡ араһынан үтеп эскә индек.

Кескәй бер бүлмә. Уң яҡта ишек. «Уфгорэнергосбыт» директоры. Иртәнге 10 сәғәттән көндөҙгө 12 сәғәткә тиклем ҡабул итә» тип яҙылған ишеккә. Ә ҡаршыла баш инженер бүлмәһе. Һулда, ҡулына полевой сумка тотҡан бер кеше йоҡомһорап ултыра. Ул, бүлмә уртаһында көпә-көндөҙ балҡып янған электр яҡтыһынан ышыҡланырға тырышыпмы, кепкаһын маңлайынараҡ төшөрөп кейҙе. Күрәһең, күптән ултыра был кеше.

— Шуныһы насар, киткән сағында сәғәттәр ҙә туҡтап ҡалған һымаҡ була, — тип стеналағы сәғәткә ҡараны бер оло йәштәрҙәге ҡатын. Ул беҙ ингәндә лә директор ишеге төбөндә баҫып тора ине.

— Күптәнме һеҙ бында? — тип һорарныҡ беҙ унан.

— Бөгөн есәнсә көн йөрөйем. Һис тә инеп булмай, үҙ сотрудниктарын йыя ла ултыра... Тағы ла бына сәғәт 12-се инде... — тип уфылдап ҡуйҙы.

Шуныһы ғәжәп, учреждениеның ҡабул итеү бүлмәһендә сотрудниктарҙан исмаһа бер кеше лә юҡ. Өҫтәлдә яңғыҙ ултырған телефон шылтыраны. Ләкин яуап биреүсе булманы. Шулай та[...] ланды был бер нисә тапҡы[...] дер тағы ла шылтырата. Ү[...] рыусы бераү телефон трубк[...] ала:

— Эйе, Энергосбыт... мин[...] ник бүлек начальниге Альт-Ш[...] Кем кәрәк? Шулай, эйе, [...] цияламы. 37 урын... ярай, [...] мен. — Был, станциянын [...] ҙар дворынан шалтыраталар[...] рәһен.

Альт-Шуль директор каби[...] нә инеп китте. Оҙаҡламай б[...] чальник тә кире сыҡты, ләки[...] ректорға инергә рөхсәт юҡ. [...] 12-се 20 минут. Бынан һу[...] ректорға уның бик күп с[...] никтары инеп сыҡтылар. Б[...] ҡыт эсендә диванда ултыр[...] левой сумкалы кеше лә б[...] женерға инергә бер нисә т[...] ынтылып ҡараны, ләкин һ[...] ҡырҙа кабинеттан — «Я[...] тигән тауыш ишетелде.

Ваҡыт үтте.

Ҡулына бер ҡағыҙ ки[...] ҡан аҡ һаҡаллы ҡарт кил[...] Ул кемгә мөрәжәғәт итерг[...] мәстән, үҙ-үҙенә һөйләне[...] ҡыймаҫ ҡына һул яҡҡа [...] атланы. Унда тап ишек ү[...] нә:

— «Инергә ярамай!», тип [...] ғайны.

Ҡарт ҡарап торҙо ла, ка[...] кеҫәһенә һалып, йәнә кори[...] сығып китте.

Беҙгә «сират» еткәндә [...] торҙың ҡабул итеү ваҡыт[...] ҡайһе инде.

— Совет граждандарын[...] тыжҙары тураһында с[...] «хәстәрлек» итеүсе был [...] никтең ҡәҙере лә шул сәғәт[...] налыр инде... Беҙ Мәскәү[...] нистрға инеү өсөн дә шул [...] оҙаҡ көтмәйбеҙ, — тип оло [...] тәге ҡатын да кире сығып к[...]

Был начальниктең ҡабул[...] һында тәртип индереү бик к[...]

Г. Б[...]

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Өфөнөң 11-се номерлы һөнәрселек училищеһы

1948—49 уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итә

14—16 йәштәрҙәге ир балалар түбәндәге специальностәр буйынса ҡабул ителәләр: наборщиктар, печатниктар, оборудование буйынса слесарҙар, токарҙар — универсалдар, автомат накладчиктары, 15—16 йәштәрҙәге ҡыҙҙар китап тегеүҙе өйрәнеү өсөн ҡабул ителәләр.

Училищеға ҡабул ителеүселәрҙең белемдәре 4 кластан түбән булмаҫҡа тейеш. Уҡыу срогы ике йыл. Уҡыусылар хеҙмәт резервтары работниктары өсөн билдәләнгән дөйөм [...] нормаһы буйынса, ашау менән көнөнә 3 тапҡыр тәьмин ителәләр. Ә наборщиктар һәм печатниктар күтәренке норма менән тәьмин ителәләр. Ике комплектта эш кейеме һәм парад кейеме бирелә. Былар ҙан башҡа уҡыусылар уҡыған өсөн хеҙмәт хаҡы алалар. Мәктәптең дөйөм торлағы юҡ.

Мәктәпкә инеү өсөн түбәндәге документтар кәрәк: ғариза, белем тураһында белешмә, метрика, паспорт (16 йәштәгеләрҙән), торған урыны тураһында белешмә, һаулығы тураһында белешмә, 6 фотокарточка.

Ғаризалар 15 майҙан ҡабул ителәләр. Ҡабул итеү комиссияһы 1 июлдән 20 августҡа тиклем эшләй. Уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Адрес: Өфө ҡалаһы, Нуриман урамы, 17-се номерлы йорт, телефон номерҙары 2-95-09, 2-89-25.

Дирекция.

Специалист кәңәштәре

Парҙы иртә срокта һәм тәрән һөрөргә

Дәүләкән районы «Новый быт» колхозының орденлы Пономарева М. М. звеноһы үҙған йыл һәр бер гектарҙан 21,45 центнер арыш урожайы алыуға өлгәшкән ине. Звено иртә парҙы майҙың 25 көнөнә һөрөп ҡуйҙы һәм һөрөү тәрәнлеге 22 сантиметрҙан кәм булманы.

Дүртөйлө районы Ленин исемендәге колхоздың Шакирова Фәрһинә звеноһы һәр бер гектарҙан 37,98 центнер арыш урожайы алды. Бында ла пар иртә срокта һәм тәрән итеп һөрөлдө. Ул йәй буйына таҙа итеп тотолдо, бының өсөн пар участкаһы өс тапҡыр культивацияланды, сәсеү үткәреүҙән өс аҙна элек ике ҡатланды. Һәр бер гектар ерге 100 йөк тиреҫ индерелде. Арыш теҙмә юл менән 12 августа сәселде.

Йөҙләгән юғары урожай мастерҙарының арыш үҫтереүҙәге агротехник саралары нигеҙҙә ошоларҙан: парҙы иртә срокта һәм тәрән итеп һөрөүҙән, тиреҫ ҡулланыуҙан, август айында теҙмә юл менән сәсеүҙән, ҡыш ҡар тотоуҙан, яҙ тырматыу һәм өҫтәмә аҙыҡландырыуҙан тора.

Бөгөн алда был комплекстың иң яуаплыһы — таҙа пар булдырыу бурысы тора. Арыш — беҙҙең республикала иң юғары һәм тотороҡло урожай бирә торған бөртөклө ашлыҡ культураһы. Унан киләһе йылда юғары урожай алыу өсөн бөтәһенән элек, арышты иртә һөрөлгән таҙа парға сәсергә кәрәк. Иртә пар урожайҙы икеләтә арттыра. Башҡортостандың тәжрибә баҫыуҙарында һуңлап һөрөлгән парҙың бер гектар ерендә иң бары 12,2 центнер арыш урожайы алынғанда, иртә срокта һөрөлгән парҙан 22,6 центнер урожай алынды. Тиреҫ менән ашланған иртә парға сәселгән ерҙән урожай 30,5 центнер булды.

Быйылғы ҡоролоҡло яҙ шарттарында парҙы иртә сроктарҙа һөрөүҙең әһәмиәте тағы ла ҙурыраҡ. Аяҙ һәм елле көндәрҙә ер бик ныҡ кибә. Ә инде оҙаҡ һөрөлмәй ятҡан ерҙәрҙә кибеү процессы тағы ла көслөрәк була. Был шарттарҙа тупраҡтың өҫкө һөрөнтө ҡатламы ныҡ ҡата. Бындай тупраҡ һуңлап һөрөлгәндә, бик насар эшкәртелә, уны һөрөүгә артыҡ күп көс талап ителә һәм көҙ, яҙ йыйналған дым бөтөнләй тейерлек кибеп бөтә.

Икенсе мөһим момент шунан тора: май айы артыҡ йылы булыу арҡаһында ҡый үләндәре иртә үҫә башланылар, улар ныҡ тамыр йәйәләр. Пар һөрөүҙе һуңлатҡанда ҡый үләндәренә ҡаршы көрәшеү бик ныҡ ҡыйынлашасаҡ. Улар тулыһынса ҡырҡылмай ҡаласаҡтар, сей ҡалдырып һөрөләсәк. Шул уҡ ваҡытта улар ерҙә былай ҙа аҙ булған дым запасын бик ныҡ кәметәләр.

Былардан сығып шундай һығымта яһарға кәрәк: быйылғы шарттарҙа һуңлап һөрөлгән парҙарҙың ҡый үләнләнеүе һәм дымһыҙ ҡалыу ҡурҡынысы бар. Бындай пар ерҙәрендә сәселгән арыш һуңлап һәм һирәк шыта, көҙгә тиклем насар үҫешләнә һәм бик насар ҡышлай. Быны булдырмаҫ өсөн бер генә сара бар: парҙы иртә срокта һөрөп, уны йәй буйынса таҙа итеп тоторға кәрәк.

Яҡшы таҙа парҙың икенсе төп сифат күрһәткесе — уны тәрән итеп һөрөү. Парҙы тәрән итеп һөрөү — ҡый үләндәренә һәм ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәштә ышаныслы сара. Аҡ тамыр, эт эсәге, төрлө билсән, һөт үләне, ҡырлы ҡурай, ҡаҡы, ҡара һоло, бесәй ҡойроғо кеүек яуыз һәм беҙҙең шарттарҙа күп таралып үҫкән ҡый үләндәренә ҡаршы тик ерҙе тәрән итеп һөрөү аша ғына көрәшергә мөмкин.

Төп һөрөү тәрәнлеге 20—22 сантиметр. Ләкин был тәрәнлектә шаблон ҡулланырға ярамай. Билсән, эт эсәге кеүек үлән тамырҙары менән ҡыйланған участкаларҙы 23—25 сантиметр тәрәнлегенә тиклем һөрөргә кәрәк. Шуныһы уларҙың ерҙә ҡалған тамыр киҫәктәре яҡынан йәш тамыр йәйеп, тиҙ үҫә башлайҙар. Башҡа төрлө ҡый үләндәре менән сүпләнгән участкаларҙы һөрөү тәрәнлеге 20—22 сантиметрҙан да кәм булырға тейеш түгел. Тик һөрөнтө ҡатламы йоҡа булған (ҡалҡыу, һоро-урман тупраҡтар) тупраҡ төрҙәрендә генә һайыраҡ итеп һөрөргә мөмкин, ләкин был ваҡиғала ла бөтә һөрөнтө ҡатламды алдырырға кәрәк.

Ерҙе культуралы итеп һөрөүҙә предплужниктарҙың роле билдәле. Предплужниктар ҡулланып һөрөү тик үҙе генә лә агротехник прием булыу яғынан урожайҙы 2—2,5 центнерға күтәрә ала. Ҡый үләндәренә ҡаршы көрәшеүҙә уларҙың әһәмиәте тағы ла ҙурыраҡ. Предплужникле һабандар менән һөрөлгән ерҙәрҙең өҫтө тигеҙ һәм эре кәҫле балсыҡһыҙ була, дым яҡшы һаҡлана. Ундай ерҙе йомшартыу өсөн бер эҙҙән тырматыу ҙа етә. Быны иҫ өсөн пар һөрөү осоронда предплужниктарҙы тулыһынса файҙаланыуға айырыуса ныҡ иғтибар итергә кәрәк.

Быйылғы шарттарҙа пар һөрөү менән уны тырматыу араһында 1—3 көн генә түгел, бәлки 1—3 сәғәт өҙөклөк тә булдырырға ярамай. Өфө тәжрибә баҫыуындағы быйылғы күҙәтеүҙәр иртән һөрөлгән парҙы кискә тиклем тырматмағанда, дымдың 20 — 25 процентҡа тиклем кәмеүен күрһәтәләр. Ә инде икенсе көнгә тырматыуға ҡалдырылған ерҙе бөтөнләй тырматып булмағанлығы беленде. Тупраҡ бик ныҡ ҡатып китә.

Юғарыла күрһәтелгән агротехник талаптарҙы тулы үтәгән шарттарҙа ғына пар сифатлы буласаҡ һәм быйыл сәселәсәк арыштан юғары урожай алыу өсөн ныҡлы нигеҙ һалынасаҡ. Бына шуның өсөн дә сифат өҫтөнән контролде көсәйтергә, был эшкә бөтә агрономдарҙы йәлеп итергә кәрәк.

Агроном В. Ғирфанов.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-45, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 01785 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 109
2
июнь
шаршамбы

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы колхоздарына, колхозсыларына һәм айырым хужалыҡтарына баҙарҙарҙа иген һатыуҙы рөхсәт итеү тураһында (1-се бит).

Яҙғы сәсеү планын үтәү өсөн көрәште бер генә минутка ла йомшартмаҫҡа! (1-се бит).

Е. Городецкий. — Партия өсөн көрәштә В. И. Ленин (2-се бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. И. Ниғмәтуллин. — Совет кадрҙарын эш тәжрибәһендә тәрбиәләргә (2-се бит).

Советтар Союзында (2-се бит).

З. Хисмәтуллин. — Банат Батырова звеноһында (3-сө бит).

Н. Ртищев. — Урман промышленносендә даими кадрҙар тупларға (3-сө бит).

И. Пауль, Ғ. Ибраһимов — Студенттар лекторияһы (3-сө бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар (4-се бит).

Партия райкомы—политик етәкселек органы

Һуғыштан һуңғы тыныс төҙөлеш осоро Тыуған илебеҙ алдына ғәйәт ҙур яңы бурыстар ҡуйҙы. Халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарын артабан үҫтереү буйынса башҡарылырға тейешле булған бөйөк эштәр сталинсе яңы биш йыллыҡ план менән билдәләнде. Беҙҙә был планды үтәү һәм арттырып үтәү өсөн кәрәкле булған бөтә шарттар бар. Алға табан хәрәкәтебеҙҙең темптарын тиҙләтеү маҡсатында социалистик системаға нигеҙләнгән бөтмәҫ-төкәнмәҫ мөмкинлектәрҙе тулыраҡ файҙаланыу өсөн партия ойошмаларының етәкселек итеү кимәлен бик ныҡ күтәреү талап ителә.

Партияның күптән түгел булып үткән район, ҡала һәм өлкә конференциялары райкомдарҙан политик етәкселек органы булып әүерелеүҙе ҡаты рәүештә талап итте. Конференцияларҙа райкомдарҙың политик етәкселеккә зарар килтереп хужалыҡтың ваҡ, ағымдағы мәсьәләләре менән генә мауығыуҙары ҡаты ғәйепләнде. Хужалыҡ ойошмаларының эшенә дөрөҫ политик йүнәлеш биреү, уның үтәлешенә контроль яһау, партия-политик эште киң йәйелдереү юлы менән массаны хужалыҡ пландарын үтәүгә мобилизовать итеү партия райкомдары алдына төп бурыс итеп ҡуйылды.

Хужалыҡ уңыштарының ныҡлығы масса араһындағы политик эштең торошона айырылғыһыҙ рәүештә бәйләнгән. Большевиктәр политиканы хужалыҡ эшенән бер ваҡытта ла айырмайҙар. Ләкин партия, хужалыҡ эше менән артыҡ һәм бер яҡлы ғына мауығыуҙың зарарлы булыуы тураһында иҫкәртә, партия органдарынан хужалыҡ менән тәрәндән шөғөлләнеүҙе, хужалыҡ мәсьәләләрен политик етәксе сифатында хәл итеүҙе талап итә. Партия үҙенең практик эшендә совет һәм хужалыҡ ойошмаларын урап үтмәй, хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә уларҙың ойоштороусылыҡ ролдәрен бөтә яҡлап нығыта һәм көсәйтә бара.

Хужалыҡтың мөһим, перспектив мәсьәләләре менән тәрәндән рәүештә шөғөлләнеү, уларҙы хәл итеү өсөн массаның киң ҡатламын фиҙакәр көрәшкә күтәреү — партия райкомдарының мөҡәтдәс бурысы булып тора. Райком был мәсьәләләрҙе тәүге партия һәм комсомол ойошмалары ярҙамында хәл итергә тейеш. Хужалыҡтың ағымдағы бик күп төрлө эштәре менән үҙе шөғөлләнеүсе партия райкомы хужалыҡ ойошмаларын урап үтә башлай, шулай итеп, тәнҡитләү һәләтен юғалта, үҙен политик контроль хоҡуҡынан мәхрүм итә, хужалыҡ үҫешенең төп мәсьәләләрен оното. Был, хужалыҡҡа партия етәкселегенең кимәлен түбәнәйтеүгә килтерә.

Был йәһәттән партияның Бишбүләк райкомының эш практикаһы бик характерлы. Хужалыҡ һәм культура төҙөлешө эштәренең торошо өсөн совет, хужалыҡ һәм ер органдарының яуаплылыҡтарын көсәйтеү урынына, райком уларҙың функцияларын үҙ өҫтөнә ала. Бюро ултырышында күберәк хужалыҡтың ваҡ мәсьәләләре ҡарала. Ә колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан нығытыу, общественный милкте арттырыу кеүек бик мөһим һәм перспектив мәсьәләләр тикшерелмәй. Шуға күрә лә, районда иң әре 13 колхоздың артта ҡалыуы, ойоштороу-хужалыҡ яғынан көсһеҙ булыуы ғәжәп түгел.

Бишбүләк районында партия-политик эш бик насар ҡуйылған. Райком үҙ эшендә тәүге партия ойошмаларына таянмай һәм уларҙың эштәрен йәнләндереү буйынса эшлекле саралар күрмәй. Уның работниктәре урындарҙа булған саҡта хужалыҡ мәсьәләләре менән генә шөғөлләнәләр, ә тәүге партия ойошмаларының эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Совет учреждениеларындағы тәүге партия ойошмаларының эшенә бөтөнләй иғтибар бирелмәй. Шунлыҡтан, улар аппараттың аныҡ һәм оператив эшләүе, хужалыҡ мәсьәләләрен үҙ алдына хәл итеүе өсөн көрәште ойошторомайҙар.

Дөрөҫ, партияның район, ҡала конференцияларынан һуң күп кенә райкомдар үҙҙәренең эш методтарын үҙгәртә башланылар. Мәҫәлән, ВКП(б)-ның Туймазы район комитеты (секретары иптәш Баранов) үҙенең эш стилен яҡшы уҡ үҙгәртеүгә өлгәште. Хәҙер райком төп иғтибарҙы партия-политик эште көсәйтеүгә, тәүге партия ойошмаларын нығытыуға һәм уларҙың боевой һәләтлектәрен күтәреүгә йүнәлтте. Райком работниктәре урындарҙа булып, ойоштороу-партия, политик-массовый эштәрҙе юлға һалыу, партияның юғары органдары ҡарарҙарының аныҡ үтәлеүенә өлгәшеү буйынса тәүге партия ойошмаларына практик ярҙам күрһәтәләр.

ВКП(б)-ның Туймазы райкомы хужалыҡ ойошмаларының эшенә политик йүнәлеш бирә, тәүге партия, комсомол ойошмалары аша ауыл советтарына һәм колхоз правлениеларына бөтә яҡлап ярҙам ойоштора. Яҙғы баҫыу эштәре башланыу алдынан райком сәсеүҙең конкрет срогын билдәләне, хеҙмәтте ойоштороу, эшсе һәм тартыу көстәрен дөрөҫ файҙаланыу буйынса ауыл хужалығы бүлегенә, район башҡарма комитетына аныҡ күрһәтмәләр бирҙе. Билдәләнгән сараларҙың үтәлешен райком бюроһы үҙенең ныҡлы контроленә алды. Һөҙөмтәлә, Туймазы районы яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә өлгәште.

«Беҙҙең эске һәм тышҡы политикабыҙҙың бөтә төп мәсьәләләрендә, — ти иптәш Сталин, — етәкселек роле партия ҡулында булды. Һәм бары тик шул арҡала үҙебеҙҙең эске һәм тышҡы политикабыҙҙа беҙ уңыштарға өлгәштек». Бына шуға күрә лә, партияның эске эштәрен яҡшыртыу, шул нигеҙҙә хужалыҡ һәм культура төҙөлешенә партия етәкселеген көсәйтеү — бөгөнгө көндә иң мөһим бурыстарҙың береһе булып тора.

Партия райкомы үҙенең пленумдарында, бюро ултырыштарында мөһим перспектив мәсьәләләрҙе хәл итергә, алға ҡуйған маҡсатҡа өлгәшеүҙең аныҡ юлдарын билдәләргә, уны тормошҡа ашырыуҙа туранан-тура яуаплы ойошмаларҙың эшенә ныҡлы контроль булдырырға бурыслы.

Политик етәкселектең кимәлен күтәреү, бөтә тәүге партия ойошмаларының эшен йәнләндереү, масса араһында большевистик агитация һәм пропаганданы киң йәйелдереү, совет, хужалыҡ һәм ер органдарының тапшырылған эш өсөн яуаплылыҡтарын ҡырҡа күтәреү, хеҙмәтсәндәрҙе биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә ойоштороу — партия райкомдарының иң мөһим бурысы булып тора.

Башҡорт АССР-ы колхоздарына, колхозсыларына һәм айырым хужалыҡтарына баҙарҙарҙа иген һатыуҙы рөхсәт итеү тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ҡарары 1948 йыл 1 июнь

ССР Союзы Министрҙар Советының 1948 йыл 26 майҙағы ҡарарына ярашлы рәүештә һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының 1948 йыл 12 февралдәге 126-сы номерлы ҡарарына өҫтәмә рәүештә, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ҡарар итә:

Башҡорт АССР-ының бөтә райондарының колхоздарына, колхозсыларына һәм айырым хужалыҡтарына иген, он һәм бешкән икмәк һатыу һәм алмаштырыуҙы рөхсәт итергә.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателе Н. Уразбаев.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Эштәре менән идара итеүсе А. КУРМАЕВ.

Яҙғы сәсеү планын үтәү өсөн көрәште бер генә минутка ла йомшартмаҫҡа!

Ойошҡанлыҡ эштең уңышын хәл итте

Беҙҙең колхозды МТС хеҙмәтләндермәй. Тартыу көстәренең, бигерәк тә ауыл хужалығы машиналарының етешмәүе сәсеү һәм урожай йыйнау кампанияларын үҙ ваҡытында уңышлы үткәреүгә бик ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Ләкин беҙ был ауырлыҡтар алдында бер ваҡытта ла юғалып ҡалғаныбыҙ юҡ. Үҙебеҙҙә булған мөмкинлектәрҙе тулыһынса һәм дөрөҫ файҙаланыу арҡаһында һәр бер эште ваҡытында һәм яҡшы итеп үткәрәбеҙ. Беҙ быйыл да яҙғы сәсеүҙе районда икенсе булып тамамланыҡ. Иртә культуралар сәсеү планын 12 көндә үтәнек. Ә һуңғы культуралар сәсеүҙе 28 майға тулыһынса бөтөрҙөк.

Беҙ был уңышҡа эште оҫта ойоштора белеү һәм колхозсыларҙың тырышып эшләүҙәре арҡаһында өлгәштек. Һәр бер кеше социалистик ярышта алған йөкләмәһе үтәүҙә үҙендә ҙур яуаплылыҡ һиҙҙе. Үҙған йыл бойҙайҙың һәр бер гектарынан 10-ар центнер урожай алынһа, быйыл һәр бер гектарҙан кәмендә 15-әр центнер урожай алыу өсөн көрәш бара.

15 һабансы иртәнге ҡараңғынан, кискә ҡараңғыға тиклем бер туҡтауһыҙ ер һөрҙө. Өлкән ат ҡараусы Батыр Ғәлләмов, Йософ Әхмәдуллин иптәштәрҙең аттарҙы баҫыу эштәре башланыуҙан элек өс аҙна буйына ныҡлап ял иттереүҙәре, яҡшы ашатыуҙары эште бик ныҡ еңеләйтте. Улар сәсеү осоронда ла аттар эргәһенән китмәнеләр. Уларҙы баҫыуҙа үҙҙәре смекалап ашаттылар, ял иттерҙеләр. Шуның һөҙөмтәһендә һабансыларҙан Хөсәйен Ғәлин, Илья Потребняк, Рәхимйән Имһаншин иптәштәр һәр көндә 0,80-шәр гектар ер һөрҙөләр.

Һөрөлгән ер шунда уҡ тырматыла барылды. Был эштә беҙ колхоздың 24 баш мөгөҙлө эре малын файҙаландыҡ. Тырмасыларҙан Килмөхәмәт Булатов, Хөрмәтулла Рамазанов, Хәдисә Сәләхетдинова иптәштәр үгеҙҙәр менән көн һайын бәрәр гектарҙан артыҡ ер тырматтылар.

Баҫыу эштәрен алғалә үткәреү өсөн иптәш Фәүзиә Ғәләүетдинова етәкселек иткән алдынғы бригада иптәш Беляков бригадаһы менән социалистик ярышҡа сыҡҡайны. Иптәш Ғәләүетдинова бригадаһы сәсеүҙе беренсе булып тамамлап, ферма өсөн да 6 гектар ашлыҡ сәсте.

Колхоз партия ойошмаһы (секретары иптәш И. Халтурин) баҫыу эштәренә башлауҙың тәүге көндәрендә үк культура көстәрен баҫыуға күсерҙе. БАССР Верховный Советы депутаты, уҡытыусы иптәш Ғаян Ғиззатуллина етәкселегендә 13 агитатор систематик рәүештә һабансылар, тырмасылар араһында агитацион-массовый эш алып барҙылар, «Боевой листоктар» сығарҙылар.

Хәҙер бөтә көс пар һөрөүгә һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәренә тупланды. Пар һөрөүҙә иптәш Фәүзиә Ғәләүетдинова бригадаһы алда бара. Колхоздың маҡтаулы тимерсеһе Рамазан Ҡотлогилдин сәсеү ҡоралдарын ремонтлау эшен тамамлау менән үк молотилка, урғыс һәм бесән сапҡыс машиналарҙы ремонтлауға башлағайны. Беҙ урожай йыйнауға әҙерлек эштәрен дә районда беренсе булып тамамларсаҡбыҙ.

А. Борһанов,
Архангель районы Ғафури исемендәге колхоз председателенең урынбаҫары.

Хеҙмәт дөрөҫ ойошторолмаған

Маҡар районы «Ялан яр» колхозында хеҙмәтте звено системаһында ойоштороуға иғтибар итмәйҙәр. Бында баҫыусылыҡ буйынса 7 звено ойошторолһа ла, хәҙер уларҙың береһе лә эшләмәй. Колхоз председателенең урынбаҫары иптәш Сафин:

—Сәсеү ваҡытында звено менән эшләмәйбеҙ әле, сәсеү эштәре тамамланғас та, уларға участкалар бүлеп бирәсәкбеҙ, — ти.

Бында күпселек колхозсылар баҫыу эшендә ҡатнашмайҙар. Хеҙмәткә ярарлы 278 кешенең тик 55—60-ы ғына эшкә йөрөй. Ә башҡа колхозсылар үҙ хужалыҡтарында шөғөлләнәләр. Эштә индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаның ҡулланылмауы, көндәлек эшкә көн һайын йомғаҡ яһамау, социалистик ярыштың ойошторолмауы арҡаһында эштә ҡатнашыусы колхозсылар ҙа көндәлек норманы 40—50 процентҡа ғына үтәйҙәр. Эштең сифатына иғтибар ителмәй. 14—15 сантиметр тәрәнлегендә генә һөрөлгән, яҡшылап эшкәртелмәгән 15 гектар майҙанда сәсеү ҡул менән үткәрелде.

Колхозда шулай уҡ йәнле тартыу көстәре лә тулыһынса файҙаланылмай. 34 баш аттың 20-һе генә баҫыу эшендә ҡатнаша. Ә мөгөҙлө эре малдар эшкә бөтөнләй ылыҡтырылмағандар.

—Баҫыу эшенең тәүге биш көнлөгөндә фермалағы һәм колхозсыларҙың мөгөҙлө эре малдарын файҙалана башлағайныҡ та, партия ойошмаһы секретары иптәш Фәхриевтең «һыйырҙар менән мәшәҡәтләнеп ваҡыт үткәрергә ярамай» тип ҡырт киҫеүенән һуң был эште ташланыҡ, — ти колхоз председателе иптәш Мирсаяпов.

Баҫыу эштәренең графиге һәр ваҡыт өҙөлөп килә. Яҙғы сәсеү планы иң бары 62 процентҡа ғына үтәлде.

С. Сәйфуллин.

„Ташлы тау“ колхозында

«Ташлы тау» колхозы Илеш районының иң әре хужалыҡтарының береһе.

Был колхоз менән бер нисә йыл инде Ватан һуғышы инвалиды иптәш Әхияров етәкселек итә. Ул яҡшы хужалыҡсы һәм оҫта ойоштороусы. Ауыл хужалығы эштәрен үҙ ваҡытында юғары сифатлы итеп үткәреү һөҙөмтәһендә колхоз йыл һайын юғары урожай ала.

[illegible] 500 гектар майҙанда ашлыҡ культуралары [illegible] 210 гектар бойҙай [illegible]

Баҫыу эштәрендә көн һайын 30 баш ат, 50—60 үгеҙ эшләне. Аттар менән ер һөрөү үткәрелде, ә үгеҙҙәр тырматыуҙа, орлоҡ ташыуҙа һәм башҡа эштәрҙә файҙаланылдылар.

В. Акимов.

Сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн булған мөмкинлектәрҙе файҙаланмайҙар

Хәйбулла районы колхоздарында сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн әле булһа ныҡлы көрәш юҡ. Райондың яҡынан 8 мең гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсәһе бар. Ә сәсеү темпы көндән-көн түбәнәйә бара. Күпселек колхоз председателдәре тракторҙарға ышанып, үҙҙәрендә булған көстө ойоштормайҙар, мөмкинлектәрҙе файҙаланмайҙар. Ә МТС етәкселәре машиналарҙың өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итеү өсөн бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр.

Бына Һаҡмар МТС-ы хеҙмәтләндергән Чкалов исемендәге колхозды алайыҡ. Бында сәсеүҙе күптән үк тамамларға мөмкин ине. МТС-тан беркетелгән өс трактордан башҡа, колхоздың үҙенең дә байтаҡ эш аты бар. Ләкин тракторҙар ҙа, эш аттары ла баҫыу эштәрендә файҙаланылмай. Машиналар төҙөк булмағанлыҡтан, бураҙнала тик ултыралар. Колхоз менән төҙөшкән договор буйынса 48-се номерлы трактор 100 гектар ер һөрөргә, 100 гектар ашлыҡ сәсергә һәм 50 гектар майҙанда культивация үткәрергә тейеш ине, ә ул баҫыу эштәре башланғандан бирле иң бары 46 гектар ер эшкәртте. МТС-тың механиктәре был колхозда булһалар ҙа, тракторсыларға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр, хатта улар үҙҙәре менән иң кәрәкле инструменттарҙы һәм запас частарҙы ла йөрөтмәйҙәр. Тракторҙар эргәһендә бер ике сәғәт булалар ҙа, кире МТС-ҡа ҡайтып китәләр.

Колхоз председателе иптәш Сынбулатов «тракторҙар эшләрҙәр әле» тип тынысланып ҡул ҡушырып ултыра. Колхоздың үҙенең ике ат сәскесе бар, улар менән һәр көндә 10 гектар ашлыҡ сәсергә мөмкин. Сәсеүселәрҙең эше менән бер кем дә ҡыҙыҡһынмай. Сәскестә эшләүсе Билалов, Сынбулатов иптәштәр көнөнә иң бары 6—7 гектар ғына ашлыҡ сәсәләр. Улар эш нормаларын күпмегә үтәүҙәрен белмәйҙәр, сөнки ике сәскес тә бер загонда эшләй. Эшләнгән эш икеһенә бергә яҙыла. Һабансыларҙың һәм тырмасыларҙың да күпселеге эш нормаларын үтәмәйҙәр.

Партия ойошмаһы колхозсылар араһында агит-массовый эште бик насар алып бара. Агитаторҙар баҫыуҙа булмайҙар. ВКП(б) райкомы һәм район Советы исполкомы бынан бер ай элек үк сәсеү эштәрен үткәреүҙә практик ярҙам күрһәтеү өсөн был колхозға вәкил итеп иптәш Ғайсинды ебәргәйне. Ләкин ул колхозды өҙәклектән сығарыу өсөн партия ойошмаһына, колхоз правлениеһына практик ярҙам күрһәтмәй. Дөрөҫ, ул колхоз председателе, партия ойошмаһы секретары менән берлектә иртәгәһе эш тураһында ҡайһы бер ваҡыт һөйләшә. Ә икенсе көндә ул эштең ойошторолоуы менән бөтөнләй ҡыҙыҡһынмай. Мәҫәлән, 27 майҙа кис менән һабандарҙы, тырмаларҙы арттырыу тураһында һөйләшелгәйне, мөмкинлектәр иҫәпләнгәйне. Ләкин икенсе көндә бер нәмә лә эшләнмәне. Колхозда һәр көндә күпме ер һөрөлөүе, йәки ашлыҡ сәселеүе тураһында белмәйҙәр.

— Был эш менән колхоз хисапсыһы шөғөлләнергә тейеш, — тиҙәр бында. Эш бына шулай барғанға күрә лә Чкалов исемендәге колхоз сәсеү планының яртыһын ғына үтәне.

«Игенсе» колхозында тағармасле 2 һәм бер яңы «НАТИ» тракторы, өс сәскес бар. Шулай була тороп та бында сәсеү өҙәлдә. Сөнки машиналарҙы һаҡһыҙ йөрөтеү арҡаһында, улар эшкә башлауҙың тәүге көндәрендә үк ватылдылар. Ат сәскесе колхоз тимерлегендә күп ваҡыттарҙан бирле төҙәтелмәйенсә ята. Трактор сәскесе лә ватылғас, МТС-ҡа ремонтҡа оҙатылғайны. Ләкин МТС етәкселәре уны тиҙерәк ремонтларға ашыҡмайҙар. Колхозда бары бер генә ат сәскесе эшләй. Ул да тулыһынса файҙаланылмай. Шул сәбәпле 50 гектар әҙер ер сәселмәйенсә кибеп ята. Колхоз председателе иптәш Баймурзин һәр бер көндә һәм сәғәтте эштә тулы файҙаланыу өсөн үҙенлә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәй. Етмәһә бойҙай һәм һоло культураларын ҡул менән сәстереп агротехниканы тупаҫ рәүештә боҙоуға юл ҡуйған. Был колхозда Һаҡмар МТС-ының өлкән агрономы Волкова һәм участка агрономы Зарянова иптәштәр ҙа йыш ҡына булалар. Ләкин улар сәсеүҙе һуҙыусы һәм агротехниканы боҙоусы был колхоз етәкселәренә килешеп ҡарайҙар.

МТС етәкселәре сәсеү эштәре менән оператив етәкселек итмәйҙәр, трактор бригадаларына үҙ ваҡытында тейешле ярҙамды күрһәтмәйҙәр. 29 майҙа Һаҡмар МТС-ы директоры иптәш Поповтың ғәйебе менән «Игенсе» колхозында яңы «НАТИ» тракторы тәүлек буйына тик ултырҙы: Сөнки иптәш Попов мискәләр юҡ тип, «Игенсе» колхозынан килеүселәрҙе бензин бирмәйенсә кире ҡайтарып ебәрҙе.

Шуныһы ғәжәп, ВКП(б) район комитеты һәм район Советы исполкомы сәсеүҙе еңәйтсел рәүештә һуҙыусы Һаҡмар МТС-ы етәкселәренең һәм колхоз председателдәренең был эштәренә һаман да тыныс ҡына ҡарауҙарын дауам иттерәләр.

Р. Шафикова.

Башҡортостанда яңы тимер юл төҙөү

Башҡортостан хөкүмәте һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөү тураһында ҡарар ҡабул иттеләр. Республикабыҙҙа был яңы тимер юл төҙөлөшө ҙур хужалыҡ әһәмиәткә эйә. [illegible]

[illegible] ҡатнашлығы менән үткәрелә. Беҙҙең бөтә өлкәләрҙәге һәр бер енеүебеҙ хеҙмәтсән массаларҙың актив ҡатнашлығы менән яулап алына. Шуның өсөн яңы биш йыллыҡ [illegible]

[illegible] шыусы райондарҙың колхоздары алдында маҡтаулы һәм яуаплы бурыстар тора. Трассаға эшкә йошҡан рәүештә сығыу, үҙҙәренә бирелгән заданиеларын срогында [illegible]

Партия өсөн көрәштә В. И. Ленин

(В. И. ЛЕНИН ӘҪӘРҘӘРЕНЕҢ УН АЛТЫНСЫ ТОМЫ БАҪЫЛЫП СЫҒЫУҒА ҠАРАТА).

В. И. Ленин әҫәрҙәренең донъяға сыҡҡан 16-сы томы 1909 йылдың сентябренән алып 1910 йылдың декабренә тиклем осорҙа, эшселәр синыфы һәм большевиктар партияһы башланып килгән яңы революцион күтәрелеш осорона [illegible] партияның юлбашсыһы тарафынан ижад ителгән әҫәрҙәрҙе үҙ эсенә ала. Был осор партияның [illegible] революцион [illegible]. Лениндең әҫәрҙәренең 16-сы томына ингән хеҙмәттәр Россияла яңы халыҡ революцион [illegible] башында тороуҙы күрһәтә [illegible].

Ике фронтта көрәш — уңдан һәм һулдан булған ликвидаторҙарға ҡаршы көрәш, 1905—1907 йылдарҙағы революция [illegible] халыҡ-ара оппортунизмға ҡаршы көрәш — Лениндең әҫәрҙәренең яңы сыҡҡан томының [illegible] бына шундай.

«Фракциялар [illegible] ликвидаторҙар», «Ликвидаторҙарҙың алымдары һәм большевиктарҙың партия бурыстары», «Партияға ҡаршы ликвидаторҙарҙың «таушы», «Отзовизм һәм алла төҙөүселәр [illegible] фракциялары», «Публицист яҙмалары» тигән мәҡәләләрендә уңдан һәм һулдан булған ликвидаторҙарға ҡаршы Лениндең [illegible] һәм килешмәүсән көрәш алып бара. Ленин уларҙың «теоретик ревизионизм», политик һәм тактик мешан методтар [illegible] юлы менән партияны емерергә [illegible] ынтылыуҙарына ҡаршы көрәшә. Был хеҙмәттәрендә Ленин ике фронтта көрәш партия үҫешенең законы икәнлеген, бындай көрәштән башҡа партияны [illegible] ысындан да партиялы, ысындан да марксистик [illegible] мөмкин түгел икәнлеген күрһәтә.

«Ликвидаторлыҡ — либераль буржуазияның контрреволюцион настроениеһе менән, демократик ваҡ буржуазия араһында емерелеү һәм тарҡалыу менән айырылмаҫ бәйләнгән [illegible] социаль күренеш» тип яҙҙы Ленин.

Ленин «Ликвидаторҙарҙың алымдары һәм большевиктарҙың партия бурыстары» тигән мәҡәләһендә «иртәгә буласаҡ революцияның» иң мөһим таянысы булған партияға ҡаршы ликвидаторҙарҙың идея һәм ойоштороу мәсьәләләре буйынса көрәштәре тураһында һүҙ барыуын күрһәтә. Лениндең гениаль алдан күреүсәнлеге большевиктарға отзовистәр йөҙөндә, уларҙың «боевой дружиналар талап итеүҙәрендә», «революцион» фразаларында һәм легаль мөмкинлектәрҙән баш тартыуҙарында тиҫкәре яғы менән әйләндерелгән шул уҡ ликвидаторҙарҙы, большевистик партиялылыҡтың дошманларын танырға ярҙам итте.

Столыпиндең, либераль буржуазияның, уң һәм һул ликвидаторҙарҙың, троцкийселәр, «бойондороҡһоҙҙар» һәм килешеүсәндәр менән бергәләп хәрәкәт итеүҙәре Лениндең хеҙмәттәрендә кире ҡағылмаҫлыҡ ышандырыу менән күрһәтелгән. Столыпин легаль булмаған партияны палач ҡулы менән, дар ағасы һәм каторгалар менән емерҙе, либералдар уны веха идеяларын пропагандалау менән эшләнеләр, ликвидаторҙар һәм башҡа «бойондороҡһоҙҙар» партияның «үлеп барыуы» тураһында ҡысҡырыуҙар менән, партия ярҙамынан баш тартыу, унан сығыуҙы аҡлау менән легаль булмаған партияны емерергә тырышалар ине.

Эшселәр синыфының революцион партияһына ҡаршы Столыпин көрәшенең системаһында бер звено булған ликвидаторлыҡ Лениндең «Публицист яҙмаларында» фаш ителә. Ленин был хеҙмәтендә Үҙәк Комитеттең 1910 йылғы ғинуар Пленумына йомғаҡ яһай һәм Пленумда сығыш яһаған Троцкийға һәм уның ярҙамсылары өҫтөнә асыу менән ташлана. Ленин уларҙың сығыштарындағы принципһеҙлекте, «яңы һыҙыҡ» артына боҫоуҙы, эҙмә-эҙлекле ликвидаторҙарҙы һәм отзовистәрҙе йәшереп тотоусылыҡты асып бирә.

Ликвидаторҙарға һәм отзовистәргә ҡаршы ҡаты көрәштә Ленин Россиялағы партия ойошмаларына таянды. Ликвидаторҙарға ҡаршы иптәш Сталиндең сығыштары бик ҙур әһәмиәткә эйә булды. «Партия кризисе һәм беҙҙең бурыстарыбыҙ», «Партиянан» тигән мәҡәләләрҙә, атаҡлы «Кавказдан хаттарҙа» Сталин ликвидаторҙарҙы, отзовистәрҙе, троцкийселәрҙе юҡҡа сығарырлыҡ итеп тәнҡитләне, һуңынан партияның Прага конференцияһында тормошҡа ашырылған Россияла ла партия эшен ойоштороу тураһындағы үҙенең планын иптәш Сталин тап бына ошо ваҡытта күтәреп сыҡты.

Лениндең һәм Сталиндең ике фронттағы көрәше уң һәм һул ликвидаторҙарҙы изоляциялауға, ә унан һуң уларҙы ҡыйратыуға килтерҙе.

Ленин үҙенең был осорҙағы хеҙмәттәрендә большевистик партиялылыҡ революцион хәрәкәт партиялылығы булырға тейеш тип күрһәтте. «Тап бына шуның өсөн, — тип яҙҙы Ленин, — киң ҡатлам массалар интересендә, уларҙы һәр төрлө буржуаз йоғонтоларҙан ҡотҡарыу интересендә, синфи төркөмдәрҙе тулыһынса һәм бөтөнләй үк асыҡлау интересендә беҙ партиялылыҡты принципиаль рәүештә яҡлайбыҙ; тап бына шуға күрә беҙгә бөтә көсөбөҙ менән партиялылыҡтың һүҙ генә түгел, ә эш булыуына өлгәшергә тырышырға һәм уны ныҡлы рәүештә күҙәтеп торорға тейешбеҙ» (Ленин әҫәрҙәренең 16-сы томы, 47-се бит).

II Интернационалдағы ревизионизм һәм оппортунизм менән көрәш Лениндең был осорҙағы хеҙмәттәрендә ҙур урын алып тора.

Ликвидаторҙар һәм отзовистәр II Интернационал лидерҙаренән туранан-тура ярҙам алдылар. Немец социал-демократтарының газетаһы «Форвертс» үҙ биттәрендә «фракцион булмаған» Троцкийҙе һәм уның Венала сығарыла торған мескен газетаһын маҡтаны. Бельгия социалистарының газетаһы «Ле Пеупле» отзовистәрҙе күккә күтәрҙе. Шулай итеп, рус оппортунистәренең һәм ревизионистәренең партияға ҡаршы емергес эштәре II Интернационалдағы уң социалистәр хәрәкәте менән ҡушылды.

Ленин үҙенең мәҡәләләрендә рус һәм халыҡ-ара оппортунизмдең берҙәм фронтын күрһәтте. Лениндең «Европа эшселәр хәрәкәтендәге фекер айырымлығы», «Ике донъя», «Копенгагендәге халыҡ-ара социалистик конгреста кооперативтәр тураһындағы мәсьәлә» тигән, һәм башҡа хеҙмәттәре II Интернационал лидерҙаренең хыянатсылыҡтарын, уларҙың буржуазияны һәм капитализмде ҡотҡарыусылыҡ ролдәрен фаш итте. Ленин II Интернационалға оппортунизм индереүселәр булыу яғынан профсоюз бюрократияһы һәм уң социалистик парламентарийҙарҙы арымай-талмай фашланы.

Владимир Ильич, герман социал-демократик партияһының Магдебург съездына арналған мәҡәләһендә, буржуаз «законсылыҡҡа» һәм буржуаз «тиң хоҡуҡлылыҡҡа» ышаныу менән үтәнән-үтә һуғарылған, был «мәңгелек» законсылыҡ алдында баш эйеүсе немец ревизионистәренең политик йөҙөн асып бирҙе. Социализмде буржуаз законсылыҡ рамкаларына һыйҙырыуҙың мөмкинлеге идеяһы менән эшселәрҙе боҙоҡландырыусы был «социалистәр» тураһында Ленин тәрән ерәнеү һәм нәфрәт менән һөйләй. Пролетар, социалистик хәрәкәт «буржуаз государствоны селпәрәмә килтереп ҡыйратырғамы йәки ҡыйратылырға һәм быуылырғамы тигән ике юл алдында тора» тип яҙҙы Ленин (280-се бит).

Халыҡ-ара оппортунизмға ҡаршы алып барылған был көрәштә Ленин һәм ленинселәр беренсе сафта торҙолар һәм II Интернационалға емергес удар яһанылар. «Копенгагендәге Халыҡ-ара социалистик конгреста кооперативтәр тураһындағы мәсьәлә» тигән мәҡәләлә Ленин француз реформистәренең маҫкаһын аса һәм улар мәҡәләне уҡыусы алдында «социал үҙгәртеп ҡороуҙар» тураһында лығырҙаныусы ғәҙәттәге буржуаз политиканлар булып килеп баҫалар. Капиталистәрҙе экспроприациялау тураһында программала урын алған положениене «капитализмде аҡрынлап еңеү» тигән тезис менән алмаштырыуҙы яҡлап сығыш яһаған немец оппортунистәрен Ленин фаш итте. «Ғәмүмән, — тип билдәләне Ленин, — немецтәр халыҡ-ара съездарҙа тотанаҡлы принципиаль линия алып барырға һәләтле түгелдәр һәм интернационалда гегемония йыш ҡына улар ҡулынан ысҡына» (255-се бит).

Большевиктәр үҙҙәренең партияһында оппортунистәрҙе һәм ревизионистәрҙе ҡаршы көрәште йәйелдереүҙәре һәм үҙ сафтарын был буржуаз агентуранан таҙарта башлауҙары менән хаҡлы рәүештә ғорурландылар. Көнбайыштағы эшселәр партиялары алдынғы рус тәжрибәһе буйынса барырға тейеш ине. Тарихи ваҡиғаларҙың бөтә барышы менән был иҫбат ителгәйне. Бына ни өсөн Ленин рус пролетариатының артталығы тураһында рус оппортунистәренең аҡыл һатыуҙарынан бик уҫал итеп көлдө. Мартов, Троцкий һәм башҡа меньшевиктәр «тактиканың» дөйөм Европа «алымдарынан» айырым рәүештә «рус социал-демократияһы артыҡ тырышып русса һөйләште» тип иҫәпләнеләр (344-се бит). Ленин «Россияла партияның эске көрәшенең тарихи мәғәнәһе» тигән мәҡәләлә рус социал-демократияһының был «русса һөйләшеүенән» «тактиканың дөйөм Европа алымдарынан» ни тиклем юғары тороуын, камилләшәнерәк, эҙмә-эҙлерәк булыуын һәм бөтә илдәрҙәге революцион социал-демократтар өсөн ысын мәғәнәлә өлгө булып тороуын күрһәтте. «...Башҡа халыҡтар унарлаған йылдар юғалтып яулап алған нәмәне рус пролетариаты үҙенең өс йыл (1905—1907) героик көрәшеүе менән үҙенә һәм рус халҡына яулап алды», — тип яҙҙы Ленин (356-сы бит). Ленин был мәҡәләлә рус эшселәр синыфы көрәшенең бөтә донъя пролетарийҙаре өсөн өлгө булып тороуын күрһәтте. Рус пролетариаты «хыянатсыл һәм ерәнес-көсһеҙ либерализм йоғонтоһонан эшселәр синыфын азат итеүҙе яулап алды. Социализм өсөн көрәштең шарты булған ирк өсөн, демократия өсөн көрәштә ул үҙенә гегемонлыҡ ролен яулап алды. Ул Россияның бөтә иҙелгән һәм эксплоатацияланыусы синыфтары өсөн революцион-массовый көрәш алып барыу оҫталығын яулап алды. Был оҫталыҡтан башҡа донъяла кешелек прогресында һис бер сериоз нәмәгә өлгәшеү мөмкин булмаған», (356-сы бит). Был яулап алыуҙар рус эшселәр синыфын һәм уның партияһын донъя пролетариатының авангарды итеп күтәрҙе.

Ленин II Интернационал оппортунистәренең рус революцион социал-демократияһына килешеүсәнлек ағыуын индерергә тырышыуҙарын емерҙе. «Донъяла һис бер конференциялар, һис бер съездар хәҙер большевиктәрҙе отзовистәр, ультиматистәр һәм алла төҙөүселәр менән килештерә алмаҫтар», — тип яҙҙы Ленин (40-сы бит).

1905—1907 йылдарҙағы революцияның һәм унан һуңғы реакция йылдарының тәжрибәһе рус һәм халыҡ-ара буржуазияның ыҡлы союзы тураһында, революцион халыҡ удары ҙарынан һуң ҡаҡшаған самодержавиены Америка һәм Европа капиталистәренең яҡларға ынтылыуҙары тураһында партияға етерлек материал бирҙе. Шулай уҡ Ленин рус һәм Көнбайыш Европа либерализменең идея яғынан бәйләнешен дә асып һалды. «Рус либерализменең идея юлбашсыларының күпселеге, — тип яҙҙы Ленин, — немец әҙәбиәтендә тәрбиәләнгәндәр һәм «капитализм мәктәбен» яҡлаусы, ләкин революцион синфи көрәш мәктәбен кире ҡағыусы Брентон һәм Зомбарт «марксизмен» махсус рәүештә Россияға күсерәләр» (366-сы бит).

Лениндең хеҙмәттәре рус пролетариатын рус либералдарына һәм уларҙың троцкийсе-мартовсы агентураһына ҡаршы һәм шулай уҡ халыҡ-ара буржуазияға һәм уның II Интернационалдағы булған ялсыларына ҡаршы ла нәфрәт менән ҡарау рухында тәрбиәләнеләр.

Рус либералдары, Көнбайыш Европа либералдары кеүек үк, «пролетариатты «реформалаштырылған», таҙартылған, «яҡшыртылған» буржуаз общество менән «килештерергә» теләйҙәр», — тип яҙҙы Ленин (150-се бит).

Столыпин реакцияһы осорондағы буржуаз политиканың һәм культураның мораль көсһеҙлеге тураһында Ленин һүҙҙәре хәҙер ҙа, ҡырҡ йылдан һуң да, ҙур көс менән яңғырайҙар. Англияның, Американың һәм башҡа илдәрҙең хәҙерге замаң «вехасылары», Ленин тарафынан фашланған Россия «вехасылары» кеүек үк, халыҡ массаһын хурлайҙар, демократияны мыҫҡыллайҙар, үҙҙәрен халыҡ асыуынан һаҡларға тейеш булған штыктар алдында баш эйәләр. «Вехалар» тураһында» тигән мәҡәләһендә Ленин либералдар һәм ысын демократтар араһындағы ҡаршылыҡты тәрән асты. «Демократия ысын массаны хәрәкәткә килтергәнгә тиклем либерал демократияға теләктәшлек күрһәтте. Демократия массаны үҙенә йәлеп иткәс, масса үҙенең бурыстарын тормошҡа ашыра башлағас, үҙенең интерестарын яҡлай башлағас, либерал демократиянан ситкә китте» (109-сы бит).

Рус идара итеүсе синыфтарының милләтселеге тип аталған нәмә Лениндең үткен тәнҡите аҫтында ап-асыҡ булып күренде, ул милләтселектең тар синфи һәм мәкерле политика икәнлеге, рус халҡының ҙур күпселегенең милли интерестәренә ҡаршы юкалдерелгәнлеге фаш ителде. Ленин Финляндия тураһындағы күп кенә мәҡәләләрендә пролетариат етәкселегендә рус халҡы батшаны фин халҡын быуып алған бармаҡтарын яҙырға мәжбүр итте, тип күрһәтте. Россиялағы революцион көрәш фин халҡына үҙенең демократик хоҡуҡтарын киңәйтергә мөмкинлек бирҙе. Ләкин Россиялағы декабрь көрәштәренә ышыҡланып ныҡынған фин буржуазияһы фин Ҡыҙыл Гвардияһына ҡаршы сыҡты, Финляндияла булған социалистәр ойошмалары азатлығына кәртә һалды, рус революционерҙарен батша полицияһына тотоп бирҙе һәм Финляндия социалистәрен рус революционерҙаренең йоғонтоһо менән боҙолдолар, тип ғәйепләне.

Был ваҡытта Лениндең: «Килер бер көн, ул ваҡытта Россия пролетариаты Финляндияның азатлығы өсөн күтәрелер...» (156-сы бит) тигән һүҙҙәре ҙур көс менән яңғырайылар.

Ленин әҫәрҙәренең 16-сы томына ингән хеҙмәттәрҙең байтаҡ өлөшө 1905—1907 йылдарҙағы революцияның тәжрибәләрен теоретик һәм политик яҡтан дөйөмләштереүгә арналған. Ленин 1905 йылғы революцияның тәжрибәһен ысыҡлап өйрәнеүҙе талап итте һәм тарихи обстановка менән иҫәпләшергә теләмәүҙәрен йәшерергә маташҡан отзовистәрҙең революцияның «тәжрибәһен иҫәпкә алыу» тураһындағы фразаларын мәрхәмәтһеҙ рәүештә фашланы.

Ленин күп кенә мәҡәләләрендә меньшевиктәрҙең революция тәжрибәһе тураһында «XX быуат баштарында Россиялағы общественный хәрәкәт» тигән биш томлы тарихи йыйынтығына юҡҡа сығарырлыҡ характеристика бирҙе. Был меньшевистик тарихта крәҫтиәндәрҙең ер өсөн көрәше реакцион тип, ә пролетариаттың стачка хәрәкәте һәм ҡоралды восстаниеһе «аҡылһыҙлыҡ» һәм «ваҡытһыҙ» тип иғлан ителә. Ленин меньшевиктәрҙең был тарихен революция көсөнә ышанмау менән үтәнән-үтә һуғарылған ренегатлыҡ тип атаны.

16-сы томға шулай уҡ Лениндең Толстой иҫтәлегенә арналған мәҡәләләре лә урынлаштырылған. Рус ерең бөйөк яҙыусыһы, Россиялағы миллионлаған крәҫтиәндәр массаһының протесен һәм ҡайғыһын сағылдырыусы бөйөк яҙыусы, Лениндең хеҙмәттәрендә гениаль баһа алды. Буржуазияның һәм меньшевиктәрҙең ялған матбуғаты Толстойҙы «йәшәргә өйрәтеүсе» тип атаны. Ленин был ялғанлауҙы Толстой учениеһенән революцияға ҡаршы яғын файҙаланырға ынтылыу, тип фашланы.

«Помещиктәр һәм капиталистәр иҙеүен ҡолатып, үҙенә кешесә тормош шарттары булдырғандың һуңында масса тарафынан һәр ваҡыт баһаланырлыҡ һәм уҡылырлыҡ художестволы әҫәрҙәр биреү менән генә Толстой сикләнеп ҡалманы, ул үҙ замандағы тәртип менән иҙелгән киң массаның кәйефен һоҡланырлыҡ көс менән күрһәтте, уларҙың хәлдәрен тасүирләне, уларҙың стихиялы тойғоларының протест һәм нәфрәтен әйтеп бирҙе».

Лениндең 16-сы томға ингән әҫәрҙәре большевиктәрҙе партиялылыҡ өсөн, Ленин—Сталин партияһының сафтарын ныҡытыу өсөн көрәштә ҡоралландырҙылар һәм ҡоралландыралар.

Большевиктәр партияһының еңелмәҫлеге, халыҡ массаһын еңеүҙәргә алып барыусы пролетариаттың еңелмәҫлеге тураһында Лениндең һүҙҙәре саҡырыу набаты булып яңғырай.

Е. Городецкий.

Совет төҙөлөшө

Совет кадрҙарын эш тәжрибәһендә тәрбиәләргә

Урындағы Советтәргә һайлауҙарҙа государство эше менән етәкселек итеүгә беренсе тапҡыр ғына яңы кешеләр килделәр. Хәҙер уларҙың күбеһе ауыл Советтәрендә председатель, секретарь булып эшләйҙәр һәм даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар менән етәкселек итәләр.

Совет органдарында бер нисә йылдар буйына эшләп килгән тәжрибәле депутаттар хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәре өҫтөнән етәкселек итеүҙә ҙур ғына уңыштарға өлгәштеләр. Күп кенә йәш депутаттар, алдынғыларҙың тәжрибәләрен өйрәнеп, халыҡ ышанысын намыҫлы рәүештә аҡлап киләләр.

Дәүләкән районының Поляковка ауыл Советы председателе иптәш Лапонов ойоштороу-массовый эштә күп ауыл Советтәренә өлгө булырлыҡ итеп ҡорған. Бында бөтә эштәр ҙә сессия тарафынан раҫланған план буйынса бара. Ауыл Советы колхоз, сельпо, мәктәп, клуб һәм уҡыу йорттары етәкселәренең отчеттарын тыңлай, социалистик ярышты ойоштороу мәсьәләләрен тикшерә. Сессияларға көн тәртибен даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың председателдәре әҙерләйҙәр һәм унда ҡушма доклад менән сығыш яһайҙар. Бригадирҙар, алдынғы колхозсылар һәм уҡытыусылар ауыл Советының иң яҡын активы булып торалар.

Культура-ағартыу комиссияһы колхоз клубтары янында үҙешмәкәр драма һәм хор түңәрәктәре ойошторҙо. Улар яҙғы сәсеү осоронда баҫыуға сығып колхозсыларға концерт бирәләр, клубта постановкалар ҡуялар. Бында ауыл клубтары һәм уҡыу йорттары колхозсыларҙың культуралы ял итә торған урыны булып тора.

Партия һәм комсомол ойошмаларының ярҙамы менән ауыл активенән агитаторҙар һайланып алынған. Улар колхоз бригадаларында, фермаларҙа эшләүсе колхозсылар араһында агитацион-массовый эш алып баралар. Беседалар үткәрәләр, ҡысҡырып газета һәм әҙәби китаптар уҡыйҙар.

Депутаттарҙың Совет эшенә яҡындан ҡатнашыуҙары һәм үҙҙәренең тирәләренә активты туплай алыуҙары арҡаһында ауыл Советы хужалыҡ эштәренең бөтә тармаҡтары буйынса ла районда алдынғы сафта бара.

Дәүләкән район Советы исполкомы бындай алдынғы ауыл Советтәре председателдәренең һоҡландырғыс эш методтарын башҡаларға күсереү маҡсатында сессияларҙа уларҙың информацияларын тыңлай. Депутаттар ойоштороу-массовый эштәрҙең ҡуйылышы тураһында үҙ-ара фекер алышалар.

Шулай уҡ районда депутаттарҙың семинарҙары йыш ҡына үҙғарыла, ауыл активы ҡыҫҡа сроклы курстарҙа уҡып, тегеләй йәки был эштең техникаһын үҙләштерә.

Ләкин республикабыҙҙың бөтә райондарында ла Совет кадрҙарын, бигерәк тә йәш депутаттарҙы тәрбиәләү эше ошолай яҡшы ҡуйылған тип әйтеп булмай. Мәҫәлгә Шаран районын алырға була.

Иптәш Устюжанин бер нисә йыл эсендә уҡытыусы эшенең мастеры булырға өлгәшкәйне. Балаларҙы коммунизм рухында тәрбиәләүҙә ҙур көс һалыуы һәм общество эштәрендә актив ҡатнашыуы өсөн хеҙмәтсәндәр уны Людмиловка ауыл Советына депутат итеп һайланылар. Ауыл Советының беренсе сессияһы уны ауыл Советы председателе итеп раҫланы.

Иптәш Устюжанин яңы урында ла халыҡ ышанысын аҡлар өсөн бөтә көсөн һәм энергияһын һалып эшләй. Баҫыуҙарға сыға, колхозсылар менән беседа үҙғара, эштең барышын тикшерә, хужалыҡ эштәрен уңышлы башҡарыу өсөн колхоз председателдәренә, бригадирҙарға һәм малсылыҡ работниктарына күрһәтмәләр бирә.

Иптәш Устюжаниндең тырышлығы һәм депутаттарҙың практик ярҙамы арҡаһында ауыл Советына ҡараған колхоздарҙың күбеһе яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреп, ойошҡан рәүештә пар һөрөргә төштеләр.

Ләкин иптәш Устюжаниндең һәм депутаттарҙың ойоштороу-массовый эш стиле менән таныш булмауҙары арҡаһында был эштәр бер яҡлап — кампания рәүешендә генә баралар. Депутаттарҙың киң ҡатнашлығында эш пландары төҙөлмәй, даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар ҙа планһыҙ эшләйҙәр. Комиссия членадарының ултырыштары протокол менән законлаштырылмай. Депутаттарҙың эшләгән эштәрен учетҡа алыу юҡ. Бындай хәлде Зиреклe, Яңы Юҙей һәм башҡа ауыл Советтәрендә лә осратып була.

Был кәмселектәр Шаран район Советы исполкомының ауыл Советтәре кадрҙарын тәрбиәләү өлкәһендә тейешле эш алып бармауынан килеп сығалар. Район Советы үҙенең ойоштороу-массовый эштәрен ауыл Советтәренә өлгө булырлыҡ итеп ҡуя алмай. Уның эш планы депутаттарҙың актив ҡатнашлығында түгел, ә аппаратта эшләүселәр тарафынан ғына төҙөлә, унда үтәлергә тейешле булған мәсьәләләргә лә яуаплы кешеләр билдәләнмәй.

Район Советтәре кадрҙарҙы тәрбиәләүҙә семинарҙар үткәреү һәм уларҙы төрлө курстарҙан уҡытып сығарыу юлдарын ҡулланыу менән бергә, юғарыла әйтелеп үтелгән массовый-ойоштороу эш методтарын да ҡыйыу рәүештә файҙаланырға тейештәр. Сөнки урындағы Совет кадрҙары ойоштороу-массовый эштәрҙең стилен ни тиклем яҡшы үҙләштерһәләр, районда хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәре лә шул тиклем уңышлыраҡ үтәләр.

И. Нигматуллин.

Советтәр Союзында

Удмурт АССР-ы. Ижевск машиналар төҙөү заводы 1 Майға пландан тыш 200-ҙән артыҡ мотоцикл эшләп сығарҙы.

Һүрәттә: «ИЖ-350» маркалы мотоциклды дөйөм йыйыу конвейере. Алдағы планда комсомолец-йәштәр бригадаһы бригадиры М. С. Пьянков. Уның бригадаһы норманы ике тапҡырға арттырып үтәй.

Н. Юдкевич фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Колхоздар яҙғы бойҙай сәсеүҙе уңышлы тамамлайҙар

Советтәр Союзының 40 өлкә, край һәм республикалары колхоздары яҙғы бойҙай сәсеү планын арттырып үтәнеләр. Заданиене арттырып үтәүселәр иҫәбенә Украина, Молдавия, Азербайжан ССР-ы, Краснодар крайы, Сталинград, Ростов, Воронеж, Пенза һәм башҡа өлкәләр инеләр.

Минераль ашламалар

Илебеҙҙең колхоздары һәм совхоздары яҙғы сәсеү кампанияһы осоронда минераль ашламаларҙы үҙған йылға ҡарағанда, бер ярым тапҡырға артыҡ алдылар. Мәскәү, Ленинград, Горький, Калининград өлкәләренең дымлылыҡ етерлек булған райондарында һәм СССР-ҙың ҡара тупраҡлы булмаған башҡа өлкәләрендә минераль ашламалар аҙыҡ культуралары сәсеүлеге өсөн беренсе тапҡыр файҙаланылалар.

Хәҙер СССР-ҙың химия промышленносе Министерствоһы предприятиеләре техник культураларҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн билдәләнгән минераль ашламаларҙы Урта Азияға, Закавказьеға һәм Украинаға ебәрә башланылар.

Көҙгө ашлыҡтарҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу өсөн азот һәм калий ашламаларын оҙатыу срогынан алда үтәлде.

Колхоз тирмәндәре

Белоруссияла колхоз тирмәндәре төҙөү киң йәйелдерелде. Күптән түгел генә Бобруйск өлкәһендәге Паричск районының «Социалистический путь» ауыл хужалығы артелендә тирмән төҙөлдө. Бында тирмәнде, циркуляр бысҡыларҙы һәм башҡа станоктарҙы хәрәкәткә килтерә торған локомобиль урынлаштырылды. Был өлкәнең күп кенә райондарында һыу тирмәндәре һалынды.

Шулай уҡ Минск, Гомель һәм Могилев өлкәләрендә лә колхоз тирмәндәре төҙөлә башланы. Хәҙер Белоруссия райондарында 740 урында ел һәм һыу тирмәндәре эшләй. Урожай йыйыу башланғанға тиклем тағы ла 160 тирмән һалынасаҡ.

Ауыл хужалығы машиналары

«Гомсельмаш» (Белоруссия) заводы инженер Зингер конструкцияһында һалам һәм силосҡа һалына торған мал аҙыҡтарын ваҡлаусы махсус машина эшләп сығарҙы. Был яңы типта эшләнгән машинаның етештереүсәнлеге иҫке конструкциялағы машинаның етештереүсәнлегенән 60 процентҡа артығыраҡ.

Завод бер үк ваҡытта бесән ваҡлау өсөн тирмән эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙе. Бесәндең оно тағы мал аҙығы өсөн файҙаланыла һәм ул малдың продуктивлеген арттыра. Тирмән сәғәтенә 500 килограмм он тарта.

* * *

Пензаның Фрунзе исемендәге заводында трактор ярҙамында эшләй торған киң эңле бесән сапҡыстар эшләп сығарыу үҙләштерелде. Беренсе биш бесән сапҡыс заводта үткәрелгән һынауҙа яҡшы һөҙөмтәләр бирҙе.

Завод был машиналарҙы массовый рәүештә эшләп сығара башланы.

Банат Батырова звеноһында

Бынан 15 йыл элек звено етәксеһе булып эшләй башлаған Банат Батырова, бәлки хеҙмәтенең шул тиклем шатлыҡ килтерәсәген көтмәгәндер. Колхозсылар ҙа яңы звено етәксеһенә артыҡ иғтибар бирмәй, хатта ҡайһы берәүҙәр тәжрибәһеҙ, белемһеҙ ауыл ҡатынының звено менән етәкселек итә алыуына ышанмай ҙа ҡарағандарҙыр...

Был турала элек сәселмәгән шәкәр сөгөлдөрөн үҫтереүгә, унан юғары урожай алыуға өлгәшеүгә ул бөтә көсөн бирҙе һәм был эштә үҙенең ҙур талантлылығын күрһәтте. Шәкәр сөгөлдөрөн үҫтереү мөмкинлеген аңлағас, ул ниндәй юлдар менән юғары урожай алып буласағын, уның үҙенсәлектәрен өйрәнде. Кем дә кем үҙен тәбиғәттең төрлө наҙлылыҡтарына бәйләнешһеҙ ҡуя ала, шул ғына үҙ еренең ысын хужаһы була алғанлығын аңланы.

— Сәсеүҙән һуң ямғыр яуырмы, юҡмы, йәй дымлы булырмы, ҡоро килерме, баҫыуҙар өҫтөнән ҡонһоҙ ҡара елдәр иҫһенме, сәсеүлек үҫергә, сәскә атырға тейеш,—ти Банат Батырова. — Яҡшы, мул, йомарт емештәрҙе ер бирә, шуның өсөн бөтә иғтибар шул ерҙе тәрбиәләүгә йүнәлдерелгән булырға тейеш.

Тәбиғәттең, ерҙең үҙсәнлектәрен, насар һәм яҡшы яҡтарын ныҡ өйрәнгән, тыштан ҡарап тороуға йыуаш ҡына күренгән Банат баҫыуҙа ҡыйыу булды. Ул һәр ваҡыт дәрт, ялҡынлыҡ, ғәйрәт менән эшләне һәм уның эштәренә бер ниндәй ҙә талыу ҡомасаулай алманы. Ул эшләй башлауҙың беренсе яҙында уҡ тик маҡтау һүҙҙәре ишетте һәм исеме газета биттәрендә күренә башланы.

Был һоҡландырғыс башланғыс ине. Банат үҙенең эш ритмын бөгөнгә көнгә тиклем һаҡлап килә. Уның йәше алтынсы тиҫтәгә бара. Ләкин кисә эшләгәнгә ҡарағанда — бөгөн, үткән йыл эшләгәнгә ҡарағанда — быйыл күберәк эшләргә, — шулай Банаттың эш стиле. Үҫеүгә тотҡарлыҡ юҡ. Әгәр кешелә үҙенең эшен камиллаштереү дәрте һүнмәһә, ул йылдан-йылға оҫтарак мастер була, үҫә бара.

Банат шулай булды ла. Уның исеме хәҙер «Иҙел» колхозында, Ҡырмыҫҡалы районында ғына түгел, бөтә республикала, хатта Союзда билдәле.

1947 йыл. Звено шәкәр сөгөлдөрөнән быға тиклем Башҡортостанда күрелмәгән урожай алды: гектарынан 611 центнер.

Хөкүмәтебеҙ Батырованың данлыҡлы хеҙмәтен уға Социалистик Хеҙмәт Геройы исемен биреп, ә уның менән ҡулға-ҡул тотошоп 15 йыл буйына бергә эшләүсе звено члендәрен ордендәр менән наградлап юғары баһаланы. Иптәш Батырова был бөйөк наградаға яуап итеп быйыл 4 гектар майҙандан 650-шәр центнер шәкәр сөгөлдөрө үҫтереп алырға йөкләмә алды. Ул, вәғәҙә бирмәҫтән элек, үҙенең звено члендәре менән һөйләште, колхоз агрономы һәм председателе менән кәңәшләште.

* * *

Яҙ һуң килде. Унан салт аяҙ көндәр башландылар. Кисә ялҡау ғына иҫкән ел, бөгөн уҫалланды, ҡотороно. Күгелйем күктә айырым һорголт болоттар күренделәр ҙә, тағы ла ҡайҙалыр китеп юғалдылар.

Банат бындай көндә әрәмгә юғалтылған һәр бер минут урожайҙы кәметеүгә алып барасағын аңлай. Ерҙең өҫтөн һыйпап үткән ел һәм ҡояш ерҙәге йоҡлаған үҫемлектәргә йән биреү менән бергә, ундағы дымды ла күккә осора. Ерҙәге үҫемлеккә иң ҡиммәтле булған дымды — аҙыҡты һаҡлап алып ҡалырға кәрәк. Батырова 2 тапҡыр культивация үткәрелгән, арҡылы-буйлы тырматылған, юғары агротехника кимәлендә сәселгән шәкәр сөгөлдөрө баҫыуы өҫтөн катокларға булды.

— Ер кибә башлаған, бөгөн уҡ катокларға кәрәк, — тине ул иптәштәренә, — бөгөн эшләмәгәндә, иртәгә һуң буласаҡ!

Һәм улар ең һыҙғанып ерҙе катокланылар, ерҙә дым һаҡлауға йүнәлтелгән башҡа сараларҙы күрҙеләр. Хәҙер ҡояш үҙенең йылыһын оҙаҡ ваҡыттар бөркөп торһа ла, ерҙең дымын үҙләштереүсән елдәр өҙлөкһөҙ өрһәләр ҙә, үҫемлеккә етерлек дым һаҡланып ҡалғайны инде.

Банат баҫыуҙың бер яҡ башына сығып тамам эшкәртелеп бөткән ергә ҡарап торҙо. Уға үҙенең аяғы аҫтындағы йәнле, ниндәйҙер, һәр ваҡыт бөтмәҫ-төкәнмәҫ көс, дәрт биреүсән ергә баҫып тороуы сикһеҙ күңелле ине. Колхоз төҙөлөшөнән элек тә Банатҡа был ерҙәрҙә күп йөрөргә, эшләргә тура килгән. Ләкин хәҙер баҫып торған йомшаҡ, йылы ер уның бөтә мөхәббәте, уның иң яҡшы уйҙары төбәлгән үҙ ере инде.

Мин Банат һәм уның звеноһы менән баҫыуҙа осраштым. Уларҙың ҡулдарында ер тигеҙләү өсөн тимер тырмалар. Банат үҙенең яҡты һәм асыҡ күҙҙәрен киң һәм сикһеҙ баҫыуға текәгән. Белмәйем, нәмә уйлай торғандыр ул? Ләкин мин уның был өлгәшелгән уңыштар менән генә сикләнеп ҡалмайынса, яңы уңыштарға ирешеү өсөн алдында торған бөтә ҡыйынлыҡтарҙы еңеп, алға барасағын яҡшы аңлайым.

З. Хисмәтуллин,
(Махсус хәбәрсебеҙ).

Һүрәттә: кабель заводының стахановкаһы иптәш У. И. Новоршанова. Ул 25 майға тиклем биш айлыҡ норманы 127 процентҡа үтәне.
В. Жданов фотоһы.

Студенттәр лекторияһы

Ишембай нефть техникумы студенттәре араһында политик тәрбиә эше алып барыу уңайы менән, партия йыйылыштарының берендә студенттәр лекторияһы ойоштороу фекере тыуғайны. Коммунистәр был фекерҙе хупланылар. Бер нисә көндән һуң уның тәүге ойоштороу ултырышы уҙғарылды.

Лекторияның составына ижади эште һөйәүсе, дәрестә яҡшы өлгәшеүсе алдынғы студенттәр ылыҡтырылды. Улар лектория ултырышында политик, фәнни һәм әҙәби характерҙа үҙҙәренә оҡшаған темаларҙы һайланылар. Шунан лектор оҙаҡ ваҡыттар буйына лекцияға әҙерләнә, беркетелгән уҡытыусы уға консультация бирә. Ә лекция тамам әҙерләнеп бөткәс, ул лектория ултырышында тикшерелә, етешһеҙ яҡтарын күрһәтеп, башҡа лекторҙар үҙ фекерҙәрен әйтәләр. Лекцияға яңы төҙәтмәләр индерелә.

Лектория ҡыҫҡа ваҡыт эсендә күп кенә лекциялар әҙерләне. IV курс уҡыусыһы Фәткуллиндең «Татар әҙәбиәте классигы Ғ. Тукайҙың ижад юлы» тигән лекцияһы айырыуса ҙур уңыш ҡаҙанды. Уны техникумда ғына түгел, башҡа предприятиеларҙа ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланылар. Ул Владимир Маяковский тураһындағы лекцияһын 9 урында уҡыны. Шулай уҡ «Яҙыусы-большевик Николай Островский», «Культура тураһында», «Краснодон батырҙары», «Совет Башҡортостаны», «Ер йөҙөндә тереклектәрҙең килеп сығыуы» тигән әҫтәлекле лекциялар үткәрелде.

Лектория башта тик студенттәр өсөн генә ойошторолғайны. Лекцияларҙың ҡыҙыҡлы һәм тәрән фекерле булыуы күптәрҙе үҙенә ылыҡтырҙы һәм уларҙы нефтселәр араһында ла уҡырға кәрәк икәнлекте күрһәтте. ВЛКСМ-дың ҡала комитеты һәм ҡала Советының культура-ағартыу бүлеге әле тегә йәки был лекцияны уҡыу өсөн лектория члендәрен ҡала ойошмаларына ебәрәләр.

Лекторияның әһәмиәте үҫкән һайын уға яңынан-яңы уҡыусылар ҡатнаша башланы.

Йәш лекторҙар быға тиклем эшләп килгән тәжрибәле иптәштәрҙән эшлекле ярҙам алалар. Икенсе курс уҡыусыһы иптәш Маркелова үҙенең «Хыял итергә кәрәкме?» тигән тәүге лекцияһын әҙерләне. Уға ҙур ярҙам күрһәттеләр. Шулай уҡ, уның «Яҙмыш бармы?» тигән икенсе лекцияһы ла ҙур уңыш ҡаҙанды. Уны беренсе номерле мәктәптең 9 — 10 класс уҡыусыларына, ә радио аша бөтә ҡала йәштәренә лә уҡыны.

Лектория члены, өсөнсө курс студенты Плецкий үҙенең «Максим Горький» тигән темалағы лекцияһын 16-сы ете йыллыҡ мәктәптә, алтынсы номерле ФЗО мәктәбендә, икенсе һөнәрселек училищеһендә, промартелдәрҙә, бораулау конторалары клубында ҡала йәштәренә һөйләне. Ул хәҙер Н. Г. Чернышевский тураһында лекция менән сығыштар яһай.

Лекторияның яҡшы эшләүе һөҙөмтәһендә студенттәрҙең активлеге, идея-политик кимәле күтәрелде.

Лектория инициативаһы менән техникумда «Һорауҙар һәм яуаптар кисәһе» уҙғарылды. Унда 400 уҡыусы ҡатнашты. Ике аҙна буйына яҙма рәүештә килгән йөҙләп һорауға уҡытыусылар, врач һәм лектория етәкселәре яуап бирҙеләр. Һорауҙарҙың политика һәм культура мәсьәләләренә арналған һәм тәрән булыуҙары техникум студенттәренең идея-политик һәм культура кимәлдәренең күтәрелеүен күрһәтә.

Хәҙерге ваҡытта лектория члендәре «Дуҫлыҡ һәм иптәшлек», «Ракетанан — реактив самолетҡа», «В. Г. Белинский» тигән темаларға лекциялар әҙерләйҙәр.

И. Пауль,
Ғ. Ибраһимов.

Урман промышленносендә даими кадрҙар тупларға

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планында урман промышленносен үҙенең даими эшселәр кадры етерлек булған, яҡшы механизациялаштырылған промышленностҡа әйләндереү бурысы ҡуйылғайны. Коммунистәр партияһы һәм хөкүмәттең хәстәрлеге арҡаһында был бурыс совет кешеләре тарафынан уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыла бара.

Урман промышленносеның ниндәй йылдам рәүештә механизациялаштырыла барыуын беҙ үҙ республикабыҙҙың миҫалдарынан уҡ күреп беләбеҙ. Мәҫәлән, Башҡортостандың урман промышленносендә үткән йылдың май айында 24 электр бысҡы иҫәпләнһә, бөгөнгә көндә улар 102 данаға еткерелде һәм бөтә ағас әҙерләүсе предприятиеларҙа ҡулланыла. Ағас ташыусы автомашиналар һаны ла үткән йылға ҡарағанда, ике тапҡырға артты.

— Дыуанлыҡ ағас ҡырҡыусы ҡарттары Юрҙән леспромхозы территорияһындағы ҡуйы урман араһында Урман-тау тимер юлы һалынасағын бөтөнләй күҙ алдына ла килтермәгәндәрҙер, — ти бөгөнгө үҫеште хәтергә алып, ағас әҙерләү мастеры Сафа Сәғитов. — Тәү башта урманда паровоз күреү ғәжәберәк булып тойолдо. Эшселәр ошо паровозда үҙҙәренең физик хеҙмәтен еңеләйтеү тураһында хөкүмәттең ҙур хәстәрлеген күреп шатландылар.

Башҡортостан урман промышленносе предприятиелары паровоздарҙан, электр бысҡылы күсмә электр станцияларҙан, ағас ташыу автомашиналарынан тыш яңы тракторҙар, һаллау машиналары, локомобилдәр, шпал ҡырҡыу установкалары һәм башҡа төр механизмдар менән ҡоралландырылған.

Ләкин бында ошо яңы техниканың, механизмдарҙың республика урман промышленносенең айырым предприятиелары тарафынан дөрөҫ һәм тулы рәүештә файҙаланылмағанлығын күрһәтеп үтергә кәрәк. Квалификациялы механиктәр һәм мотористәр кадрҙары етештерелмәүе һәм оборудованиеларға һаҡһыҙ мөнәсәбәт итеү арҡаһында ҡиммәтле механизмдар бик тиҙ эштән сығарылалар. Бынан бер йыл элек Ҡариҙел леспромхозына алынған ун ике бысҡылы ике электр станцияһының бөтөнләй эштән сығарылыуын тик ошо сәбәптәр менән генә аңлатып була. Оло-Тиләк леспромхозына бынан өс ай элек килтерелгән электр бысҡылы оборудованиеның генераторы боҙола.

Хәҙер ағас ҡырҡыуҙың һәм ташыуҙың йәйге сезоны башланды. Ә Нуриман леспромхозында ағымдағы ремонт талап иткән 12 киловаттлы электр станцияһы февраль айынан алып эшләмәй тора. «Министерствоның складында поршень алҡалары юҡ, шуға күрә ремонтлап булмай», — ти техноруҡ иптәш Булатов. Ошо уҡ леспромхоздың Сарва участкаһындағы автоколоннаһында (начальнигы Бикташиров) 13 ағас ташыу автомашинаһынан 4-һе төҙөк түгел. Юрҙән леспромхозында (техноругы иптәш Вәлиев) яңы автопарктың яртыһы эштән сығарылған.

Материалдың рациональ файҙаланылмау факттары ла бар. Мәҫәлән, Верхне-Троицк урман пунктында (начальнигы Волков) 190 фестметр таҡта ярыу өсөн локомобилгә 239 фестметр ағас яғалар.

Быларҙың бөтәһе лә БАССР урман промышленносе системаһында квалификациялы даими кадрҙар булдырыу мәсьәләһенең бөгөнгә көндә һис киҫкентергеһеҙ һәм сербез бурыс булып торғанлығын күрһәтәләр. Был нигеҙ бурысты уңышлы хәл итеү өсөн хөкүмәт тарафынан урман промышленносенә бөтә кәрәкле шарттар тыуҙырылған. СССР Министрҙар Советының 1947 йыл 8 август ҡарары менән урман промышленносен киң механизациялаштырыу, даими кадрҙар булдырыу саралары күҙҙә тотолған. Даими эшселәр бөтә налогтарҙан азат ителәләр һәм һәр бер эшсегә 0,75 гектар усадьба яңы участкаһы ерҙәре бирелә. Шуның менән бергә һәр бер эшсе йорт һала йәки 10—12 йыл срокта өлөшләтә түләү юлы менән ике-өс бүлмәнән торған әҙер йорт ала ала. Урман промышленносе предприятиеларында ағас әҙерләүҙә эшләүсе эшселәрҙең хеҙмәт хаҡы элеккегә ҡарағанда өс тапҡыр самаһына артты.

Ошондай яҡшы шарттарға ҡарамаҫтан, республиканың леспромхоздарына даими эшкә килеүселәрҙең һаны аҙ. Ҡышҡы сезонда урманда ағас әҙерләүҙә 12 меңгә яҡын сезонлы эшсе эшләне. Улар араһынан 5 мең кешене даими эшсе итеп ҡалдырыу күҙҙә тотолған булһа ла, фактик 1053 кеше генә вербовать ителгән.

Ни өсөн улай һуң ул? Нәмә ҡомасаулай? тигән һорау тыуа.

Мәсьәлә — урман промышленносе Министерствоһы етәкселәренең һәм леспромхоз директорҙарының СССР Министрҙар Советы ҡарарын еренә еткереп үтәмәүендә, эшселәрҙең тормош шарттарын яҡшыртыу өсөн ныҡышмалы көрәшмәүҙәрендә. Был тарихи ҡарарҙың сығарылыуына туғыҙ ай ваҡыт үтеп китте, ә Министерство һәм леспромхоз етәкселәре уның дөрөҫ тормошҡа ашырылыуын барлау тураһында тейешле хәстәрлек күрһәткәндәре юҡ әле. Даими эшселәргә тегә йәки был сәбәп менән усадьба яңы участкаларының бүленмәүе, индивидуаль торлаҡ төҙөүгә ссудаларҙың бирелмәүе тураһында министерствоға жалобаларҙың көн һайын яуып тороуы тап бына шул турала һөйләйҙәр.

1947 йылда индивидуаль торлаҡ төҙөлөшөнә ебәрелгән 545 мең һум аҡсаның бары 188 мең һумы ғына файҙаланылған. Хатта айырым леспромхоздар, мәҫәлән, Чумар леспромхозы етәкселәре ебәрелгән 40 мең һумдың бер генә тинен дә файҙаланмағандар. Шуның арҡаһында банк быйыл был средстволарҙы байтаҡ ҡыҫҡартырға мәжбүр булды.

Торлаҡтар, столовой, пекарня, магазин, клубтар һәм башҡа тормош көн-күреш объекттарын булдырыу, квалификациялы даими эшселәр кадрҙарын тыуҙырыу һәм уларҙы производство-техник яҡтан өйрәтеү — республиканың урман промышленносенең артабанғы үҫешен бына нәмә хәл итә.

Н. Ртищев.

Торлаҡ төҙөлөшөн киң йәйелдерергә

Башҡортостан партия ойошмаһының XXI өлкә конференцияһы төҙөлөш эштәренең, бигерәк тә торлаҡ төҙөлөшө эшенең иң артта ҡалған участка булыуын күрһәтте, партия, совет ойошмаларының иғтибарҙарын был сербез етешһеҙлекте йылдам бөтөрөүгә йүнәлтте.

Конференцияның был күрһәтмәһе Өфө ҡалаһына ла ҡайтып ҡала. Үткән йыл ҡалала торлаҡ төҙөү эштәренә капитал һалыу планының 41 процентҡа, ә торлаҡтарҙы эксплоатацияға тапшырыу 32 процентҡа ғына үтәлеүе шул турала һөйләй. Начальнигы иптәш Наконечный булған төҙөлөш ойошмаһы бигерәк тә насар эшләне. Һөҙөмтәлә билдәләнгән торлаҡ майҙандарының өстән бер өлөшө лә эксплоатацияға бирелмәне. «Башстройтрест» етәкселәре үҙҙәренә тапшырылған бурысты үтәүгә сиктән тыш һалҡын ҡаранылар. Трест бер генә объектты ла эксплоатацияға тапшырманы. Ә ул күп нәмә эшләй ала һәм эшләргә бурыслы ине.

Пландарҙың йылдан-йылға өҙөлөп килеүе эшселәрҙе торлаҡ менән тәьмин итеүҙә сербез ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Ә күп кенә предприятиеларҙың етәкселәре үҙҙәренең төҙөлөш эшен өҙөүҙәренә ҡарамаҫтан, квартира һорап ҡала Советына киләләр. Хөкүмәт тарафынан ебәрелгән ҙур средстволарҙы файҙаланмайынса, торлаҡ төҙөлөшө эшен өҙгән халда квартира һорап йөрөү һис урынлы түгел.

Быйыл торлаҡ төҙөлөшө эштәренең күләме бик ҙур. Ҡаланың 24 предприятиеһе һәм ойошмаһы тарафынан дөйөм майҙаны 26.670 квадрат метр булған 41 бина төҙөү күҙҙә тотола. Шуның эсенән 13.180 квадрат метр майҙан быйыл, ә ҡалғаны киләһе йыл эксплоатацияға бирелергә тейеш. Телефон аппараттары заводы Сталин урамында дөйөм майҙаны 1490 квадрат метр булған биш ҡатлы йорт төҙөй. Кабель заводы Ленин урамында, электротехник заводы Чернышевский урамында дүртәр ҡатлы йорттар төҙөргә тейештәр. Дүртәр-бишәр ҡаттан торған бөтәһе 13 йорт төҙөләсәк. Билдәләнгән һәм быйыл практик рәүештә башҡарылырға тейеш булған ҙур төҙөлөштә Өфө ҡалаһын төҙөкләндереү тураһында СССР Министрҙар Советы иптәш Сталин тарафынан ҡул ҡуйылған ҡарарындағы сараларҙың бер өлөшө кәүҙәләнә. Миллиондарса һум средство һалынған был төҙөлөштәр партия һәм хөкүмәттең ҙур хәстәрлеге ул. Төҙөүсе ойошмалар һәм промышленность предприятиелары был хәстәрлеккә эште большевиктарса ойоштороу менән яуап бирергә тейештәр.

Хәҙер төҙөлөш эштәрен йәйелдереү өсөн иң яҡшы ваҡыт. Үткән йылдан күскән төҙөлөштәрҙә лә, яңы объекттарҙа ла эш ҡайнарға тейеш ине. Үкенескә ҡаршы ул юҡ әле. Күп төҙөлөштәр техник документация менән тәьмин ителмәгәндәр. Ундайҙар иҫәбенә агрегат заводы (директоры иптәш Советов), ауыл хужалығы институты (директоры иптәш Рудько) һәм башҡалар инәләр. Электротехник заводы төҙөлөш алып барыла торған майҙанды әҙерләү һәм үҙләштереү эшенә башламаған да әле. Кабель заводы алып бара торған төҙөлөш майҙанында ла шундай уҡ хәл.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге төҙөлөш материалдары управлениеһы (управляющие иптәш Әминов) предприятиелары быйыл планды арттырып үтәп баралар. Ләкин был бер яҡлы ғына уңыш булып тора. Уның Өфөләге иптәш Мочалов етәкселек иткән беренсе номерле кирбес заводында ла, иптәш Либерман етәкселек иткән силикат-цемент комбинатында ла эшләп сығарылған кирбестең сифаты бик түбән. Күп ваҡиғаларҙа ҡыҙыл кирбестең 50 проценты бракҡа сыға. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, төҙөлөш ойошмалары брак эшләүселәргә ҡарата үҙҙәренең ҡаты талаптарын ҡуймайҙар. Молотов район Советы етәкселәре лә брак эшләүгә юл ҡуйыусы кирбес заводы директоры иптәш Мочаловҡа килешеп ҡарайҙар.

Торлаҡ төҙөлөшө башҡалабыҙҙы төҙөкләндереүҙә, хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреш шарттарын яҡшыртыуҙа иң мөһим эш участкаһы. Төҙөлөш ойошмаларының һәм промышленность предприятиеларының етәкселәре йәшәп килгән етешһеҙлектәрҙе һис киҫекмәҫтән бөтөрергә, яңы төҙөлөш объекттарын тиҙерәк үҙләштерергә һәм уларҙа эште йәйелдерергә тейештәр.

Бөтә эшсе һәм механик көстө, материаль ресурсты хәл иткес объекттарға тупларға, уларҙы башҡа урында файҙаланыуға юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Төҙөлөш материалдарын дүртенсе — бишенсе ҡаттарға туранан-тура мендереүҙе механизациялаштырырға кәрәк. Материал, инструмент, механизм менән тәьмин итеү, эшселәрҙең хеҙмәтен ойоштороу, шуның менән буш тороуҙарҙы бөтөрөү инженер-техник работниктарҙың төп бурысы булырға тейеш. Промышленность предприятиелары үҙҙәренең подрядчиктарына талапсан булырға, ике арала төҙөлгән договорҙың үтәлеүенә өлгәшергә бурыслылар.

Ҡаланың совет ойошмалары төҙөлөш ойошмаларының һәм төҙөлөш эштәре алып барыусы предприятиеларҙың эштәрен көндәлек контроль аҫтына алырға, уларҙың етәкселәренә талапсанлыҡты, шул уҡ ваҡытта ярҙамды көсәйтергә тейештәр. Бөтәһенән элек, профсоюз ойошмалары аша төҙөлөш эшселәре араһында социалистик ярышты киң ойоштороп ебәрергә кәрәк. Стахановсыларҙың эш тәжрибәләре һәр яҡлап популярлаштырылырға, улар бөтә коллективтарҙың достояниеһы ителергә тейеш. Һәр бер төҙөлөш участкаһында ярыш таҡтаһы, почет таҡтаһы, стена газетаһы булдырырға, уларҙы стахановсыларҙың тәжрибәләрен популярлаштырыу һәм алдынғыларҙы дәртләндереү ҡоралы итеп файҙаланырға кәрәк.

Ҡала Советы исполкомы һәм ВКП(б) ҡала комитеты башҡалабыҙҙы төҙөкләндереү эшен киң йәйелдереп ебәрергә саҡырып Өфө хеҙмәтсәндәренә мөрәжәғәт итте. Торлаҡ төҙөлөшө ҡаланы төҙөкләндереүҙә иң мөһим участка булып тора. Ҡаланың төҙөлөш ойошмалары һәм төҙөлөш эштәре алып барыусы промышленность предприятиелары етәкселәре үҙҙәренә йөкмәтелгән бурысты үтәү өсөн торлаҡ төҙөлөшөн большевистик темп менән алып барырға тейештәр.

Н. Егоров.
Өфө ҡала Советы исполкомы председателенең урынбаҫары.

Йәш специалистарҙы яҡшы ҡаршыларға

Яҡын көндәрҙә республикабыҙҙың юғары уҡыу йорттарын, техникум һәм училищеларын тамамлап, 2.500-ҙән артыҡ йәш уҡытыусылар, врачтар, агрономдар эшкә сығасаҡ. Бынан башҡа, республикабыҙҙың башҡа юғары уҡыу йорттарынан 350-гән артығыраҡ специалист аласаҡ.

Абзан, Байҡыбаш, Бөрйән, Иылайыр, Зиянчура, Матрай, Тәтешле, Хәйбулла һәм башҡа күп райондарға 30—40-ар ауыл хужалығы специалистәре, уҡытыусылар, медицина работниктәре китә.

Йәш кадрҙар — илебеҙҙең алтын фонды. Уларға ҙур хәстәрлек күрһәтелергә тейеш. Уларҙы үҙ алдарына эшләй башлауҙарының беренсе аҙымынан уҡ дөйөм иғтибар менән солғап алырға кәрәк. Йәш специалистәр үҙҙәренең теоретик белемдәрен эш процесендә яҡшы практика менән байытҡанда ғына квалификациялы работник була алалар.

Юғары уҡыу йорттарын тамамлаусыларҙы Башҡортостан райондарына билдәләү үткәрелде. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенең ҡайһы райондың ниндәй участкаһында эшләй башлаясағын белә, ҙур ҡыҙыҡһыныу һәм тулҡынланыу менән эшкә әҙерләнә. Уларҙың эштәрен яҡшы башлап алып китеүҙәре райондарҙың мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, ауыл хужалығы бүлектәренең һәм бөтә общественностең нисек ҡаршылауҙарына байтаҡ бәйләнгән. Шуға күрә хәҙерҙән үк был бүлектәрҙең яңы кадрҙарҙы ҡаршылауға әҙерләнеүҙәре кәрәк. Был эштәрҙе мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, ауыл хужалығы бүлектәре мөдирҙәре туранан-тура үҙҙәре ҡайғыртырға тейештәр. Был ойошмалар, Йомағужа һәм Илеш районы һаулыҡ һаҡлау бүлеге мөдирҙәре Бабиков һәм Сәрүәров иптәштәр кеүек, үҙҙәренә киләсәк специалистәр менән һөйләшеп һаҡи яҙма рәүештә бәйләнеш ойошторорға тейештәр. Бабиков һәм Сәрүәров иптәштәр мединститутта булдылар һәм үҙ райондарына эшкә барасаҡ йәш коллегалары менән таныштылар. Йәш специалистәр үҙҙәрен көндәлек ҡайғыртыу эсендә тойһондар. Партия, комсомол, профсоюз ойошмалары ла был эштә ҙур хәстәрлек күрергә бурыслылар. Беренсе көндәрҙән үк уларҙы актив общественный-политик эштәргә тартырға кәрәк. Директор, завуч, уҡытыусылар, врачтар, агрономдар үҙҙәренең йәш иптәштәрен ҙур ихтирам менән ҡаршыларға, үҙ кәңәштәре, эш өлгөләре менән ярҙам итергә тейештәр. Ә юғары уҡыу йорттары, техникумдар, училищеларҙың үҙҙәренең кисәге студенттәрен, уҡыусыларын онотмауҙары, уларҙың эшкә башлауының тәүге осоронда ныҡлы таяныс булыуҙары, уларға эшлекле кәңәштәр менән ярҙам итеүҙәре шулай уҡ ҙур файҙа килтерәсәк.

А. Царегородцев,
ВКП(б) Өлкә Комитеты кадрҙар бүлегенең совет кадрҙары секторы мөдире.



Быйыл Өфө менән Черниковск араһында трамвай юлы төҙөлөп бөттө. 18 километр оҙонлоҡтағы был юлда хәҙер трамвай үлсәнһеҙ рәүештә йөрөй.

Һүрәттә: 3-сө номерлә трамвай яңы асылған юлда үҙәк электр станцияһы яныңдағы ҡалҡыулыҡтан үтеп бара.

Н. Архипов фотоһы.

Яңы китаптар

◆ «Беҙҙең заман геройы». М. Ю. Лермонтов әҫәре. С. Кулибай тәржемәһе. Башгосиздат. 309 бит. Хаҡы 6 һум.

Рус классик әҙәбиәтенең иң популяр романдарының береһе булған был әҫәр башҡорт телендә элек тә (латин хәрефтәре менән) баҫылып сыҡҡайны. Был баҫманы тәржемәсе һәм редактор Ә. Харис иптәш тарафынан яңынан төҙәтелде.

◆ «Ауылда газета уҡыусы агитаторға иҫтәлек» — ВЛКСМ Үҙәк Комитетының пропаганда һәм агитация бүлегенән иҫтәлеге. Тиражы 5.000.

Был инструкция хеҙмәтсәндәргә газета уҡыусы агитаторҙарға тулы методик ҡулланма булып тора. Ауылда газета уҡыусы агитаторҙар был брошюранан үҙҙәренең көндәлек эштәрендә кәрәкле булған бөтә практик күрһәтмәләрҙе табасаҡтар.

◆ «Арифметик мәсьәләләр һәм күнекмәләр йыйынтығы». Н. Н. Никитин, Г. Б. Поляк, Л. Н. Володина. Башпланлы мәктәптәр 2-се класы өсөн дәреслек. 143 бит. Хаҡы 1 һум 20 тин.

◆ «Арифметик мәсьәләләр һәм күнегеүҙәр йыйынтығы». Н. Н. Никитин, Г. Б. Поляк, Л. Н. Володина. Башланғыс мәктәптәрҙең 3-сө класы өсөн дәреслек. Х. И. Мамлиев тәржемәһе. Хаҡы 1 һум 20 тин.

Емеш-еләк баҡсалары

Баҡалы лесхозы эргәһендә иke йөҙ гектар майҙанда емешеләк баҡсаһы булдырылды. Унда дүрт мең йөҙ тәп алма ағасы, ҡарағат, ҡурай еләге ҡыуаҡлыҡтары ултыртылды. 50 гектарҙан артыҡ майҙанға ағас питомниктәре өсөн ер бүленде... Шулай уҡ йәшен ҡайын урман фондын тулыландырыу өсөн... агас, дүрт гектар майҙанда питомник, баҡсыға ярты гектар еләк-емеш плантация ултыртылды.

Больница, мәктәп, колхоз правлениеләре, ауыл Советтәре исполкомдары территорияларын йәшелләндереү өсөн лесхоз питомниктарынан 37 мең тирәһе яңы сағаҡ, акация ағастары ебәрелде.

Х. Ғәлимов.

Дарья Гарман саҡырыуына яуап

Советтар Союзының данлы трактористкаһы Дарья Гарман-ың Осоавиахим ойошмаларында массовый рәүештә трактористар әҙерләү тураһында бөтә осоавиахимселәргә яһаған мөрәжәғәте Башҡортостан осоавиахимселәре араһында ҙур отклик тапты. Трактористар әҙерләү буйынса республикабыҙ Бәтә Союз күләмендә беренсе урынды алыуға өлгәште. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә республикабыҙҙың күп кенә райондарында тракторсылар әҙерләү курстары ойошторолоп, курстарҙа 1000-дән артыҡ тракторист уҡытып сығарылды.

Быйыл бигерәк тә Осоавиахимдың Кушнаренко, Туймазы һәм Иглин район советтәре ҙур ойошканлыҡ күрһәттеләр. Мәләүез районындағы Һуҡайлы МТС-ы механиге Баранов, Дыуан МТС-ы работниктәре Цвилев һәм Яркин иптәштәр һәр ҡайһы 20-шәр кеше уҡытып сығарҙы.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Америка сенатының юридик комиссияһы ултырышында Уоллестең сығышы

ВАШИНГТОН, 31 май. (ТАСС). 29 майҙа ярғансы сенаттың юридик комиссияһында Мундттың закон проектына ҡаршы сығыш яһап, Уоллес, Ҡушма Штаттарға «Америка конгресе ҡарамағына бығаса бер ваҡытта ла индерелмәгән иң ҡурҡыныс законсыҙлыҡ яһай» тип белдерҙе.

Мундттың закон проекты, — тине Уоллес, — АҠШ-та һүҙ һәм йыйылыштар азатлығына асыҡтан-асыҡ һуғыш иғлан итеү булып тора.

Мундт закон проектының компартия һәм башҡа ойошмаларҙың члендарын регистрациялауҙы талап итеүсе пункттары «һүҙ азатлығын бөтөрөүгә булған тағы ла күберәк асыҡ һөжүм» булып тора. Регистрация тураһындағы положение берәүҙе лә бутамаҫҡа тейеш. Закон проекты уны тыңлау менән бер ни итеп ҡалдыра, сөнки социаль үҙгәрештәргә тыныс рәүештә пропаганда менән шөғөлләнеүсе ойошманы Америка демократияһын бөтөрөү маҡсатында халыҡ-ара заговорҙа ҡатнашыусы итеп тамғалаясаҡ. Регистрация тураһындағы был талаптар нимә ойошмаларға ҡаршы ҡала һуң? Мундт закон проектының авторҙары — Дайс-Томас-Ренкин комиссияһы бөтә яуап бирә. Ирҙәр һәм ҡатындар ойошмаларын берләшеүгә һәм бошоу шарттарын йыуыштырыу ҙа хоҡуҡтарын... Америкаға ҡаршы эшмәкәрлекте тикшереүсе комиссия уларҙың тыңлау булғанын тип...

Уоллес, Американа ҡаршы эшмәкәрлекте тикшереүсе комиссияһы ҡатта, КПП-ның политик ҡарашы тураһында... «Ҡушма Штаттар конгресен ҡолатыу маҡсатлы» комитеты... коммунистик ҡампаниялар... Комиссия шулай уҡ, тип күрһәтте Уоллес, «плюралистик кәрәклегенә ышаныусыларға һөжүм итә, монополия... Комиссияның фекеренсә, «Франкоға ҡаршы сығыш яһаған кеше, фашизмға ҡаршы көрәшмәй, ә совет тышҡы политикаһын үткәрә. Әгәр һеҙ государство департаментен тәнҡитләһәгеҙ икән, һеҙ рустар яҡлы, коммунистар яҡлы пропаганда үткәрәгеҙ булып сығаһығыҙ. Әгәр һеҙ Советтәр Союзы менән дуҫлыҡҡа ышанаһығыҙ икән, һеҙ лойял түгелһегеҙ. Әгәр һеҙ раса һәм социаль тиңлеккә ышанаһығыҙ икән, һеҙ коммунизмдың тип идеяларының береһенә ышанаһығыҙ. Мундт закон проекты өсөн азат американдар һәм уларҙың ойошмалары тураһында бына ниндәй моменттәр ингеҙендә эш итәсәк. Бындай ойошмаларҙың береһенең дә регистрацияланған һәм йәшерен дауам итергә алмаясағында шик юҡ».

Уоллес һуң Уоллес Мундт закон проектының иң рәүешле хәрәкәт итасегенә миҫал килтерҙе. АҠШ менән СССР араһындағы топ фекер айырмалығын юлға һалыу өсөн һөйләшеүҙәр тураһындағы мәсьәләгә ҡағылып, Уоллес былай тине: «Мин, былай һөйләшеүҙәр өсөн конкрет нигеҙ күтәреп, премьер Сталинға асыҡ хат яҙҙым. Премьер Сталин минең тәҡдимдәремдең оҫондай һөйләшеүҙәр өсөн нигеҙ булып хеҙмәт итә аласағын белдерҙе. Президент Трумэн һәм государство секретаре Маршалл һөйләшеүҙәр башлау тураһындағы рустарҙың тәҡдимен кәтен рәүештә кире ҡаҡтылар. Мин, ундан һуң килгән Америка граждандары, шул иҫәптән газеталарҙың редакторҙары һәм журналистар был кире ҡағыуға ҡарата һәм рустарҙың тәҡдимен ҡабул итеү кәрәклеген белдерҙек. Беҙ был юлға... тыныслыҡ урынлаштырыу һәм һуғышҡа табан барыуҙы булдырмау өсөн файҙаланыуҙы талап иттек. Мундт закон проекты юстиция министрен беҙҙең партиябыҙҙы тыйырға, әгәр ул партия регистрациялаһа (ул, моғайын, шулай булыр ине) уның членддарын язаларға вәкил итеп ебәрер ине. Был закон проекты һәмәтенәсе коммунизм ҡорбан булмаҫ, ә демократия ҡорбан булыр; Карл Маркс идеяһы түгел, ә Джефферсон һәм Мэдисон идеяһы ҡорбан булыр; һуҙ вә тыныслыҡты ҡыҫып ҡулланыу-сы революция идеялары яҡлау тураһында бармай, ә беҙҙең хөкүмәтебеҙ нигеҙенән тәҙәлгән принциптәрҙе яҡлау тураһында бара. Ә был принциптәрҙе яҡлап беҙҙең халҡыбыҙ өс тапҡыр ҡанлы һуғыш алып барҙы.

Инде әйтеп үткәнемсә, был закон проекты ҡағылған кеше коммунизм һәм компартия рамкаһынан сығып китә. Ләкин хатта ул фәҡәт коммунизм һәм компартия менән сикләнгән хәлдә лә, шулай ҙа был закон проекты хоҡуҡтар тураһындағы положениене емерган булыр ине, һәм беҙҙең конституцияһыбыҙҙың принциптәренә тороусы һәр бер америкалы был закон проектын ғәйепләргә тейеш».

«Нацистар хакимлегенең һабаҡтарының береһе (беҙ быны онаторға тейеш түгелбеҙ), — тип дауам итте Уоллес, — шунан тора, коммунистарҙың конституцион хоҡуҡтарын ҡыҫыу бөтә халыҡтың азатлыҡтарына штурм яһауҙың бер генә булып тора. Германияла көрәш коммунизмға гене ҡаршы алып барылған һымаҡ ине, лэкин, ғәмәлдә Европаның бөтә государстволарының һәм беҙҙең илебеҙҙең граждандары ҡорбан булдылар».

«Беҙ колхоҙка алып барыусы юлға төштек тә инде, беҙ Атлантик хартия майсаттарынан һәм Беркәм тыныслыҡтан алыҫ киттек. Ә был маҡсаттарға беҙ еңеү өсөн наградта тип иҫәпләгәйнек.

Америка халҡы үҙе ҡоралһыҙ һуғыштың беренсе ҡорбаны булып тора. Һеҙҙең комиссияғыҙ беренсенән был яуыз сараны ҡарауға бирә тине Уоллес, — Америка халҡының ысын ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәк булған законсыҙлыҡ, конгресс канкулга таратылғанлыҡтан, юҡҡа сығарасаҡ һәм бөтөрәсәк. Беҙ, кеслеүҙәрә фактик ҡатнашыусылары — линча судында ҡатнашыусылары аҙыҡлыҡты маҡсаттығын һымаҡ — һаҡлау... кеше был комиссия тарафынан кисектерелгән һәм, матбуғаттың белдереүҙәренә ҡарағанда, был сессияһында ҡуйелгән, тип һорайбыҙ? Ни өсөн конгресс социаль тәьминат системаһын яҡшыртыу, минимум хеҙмәт хаҡын күтәреү, инфляцияны ауыратыу һәм Америка халҡы өсөн һаулыҡ һаҡлау программаһын күҙҙә тотоусы закон проекты буйынса бер төрлө лә ҡарарҙар ҡабул итмәне? Әйсе кесеңгәҙел рәүештә яллау һәм һайлау налогын юҡҡа сығарыуҙы тәьмин итеү мәсьәләләре буйынса закон проекты ниндәй яҙмышҡа осораны? Америкалылар ҡоралһыҙ һуғыш алып барыуға миллиард долларҙар менән түләтән һәм ысын иминселек өсөн тиндәр генә индергән бер ваҡытта ике партия политикаһы яҡлы кешеләр ни өсөн Россия менән үҙ-ара аңлашыу мөмкин түгел, тип белдерәләр? Мундт закон проекты яңы хаҡ — беҙҙең халҡыбыҙҙың азатлыҡтарын бөтөрөүҙе талап итә».

«Һынау коммунистарға түгел, ә конгресҡа үткәрелә. Юстиция министрен Гиммлерға әйләндереү маҡсатын күҙәткән был законсыҙлыҡ Россияға түгел, ә Американа ҡурҡыныс тыуҙыра. Регистрацияланырға тейеш булған һәр бер коммунисҡа әндәшмәүгә мәжбүр ителгән меңәрләгән либерал тура киләсәк. Ә либералдарҙың тауыштары демократияны һаҡлау өсөн бик әһәмиәтле булып тора. Һуғыш тоҡандырыусылар, ҡурҡыныс һәм дошманлыҡ тоҡандырыусы кешеләр. Мундт закон проекты кеүек ошондай законсылыҡтың инициаторы булған кеше тарих суды тарафынан Америка игеҙәктәре Муссолини һәм Гитлер һымаҡ итеп тамғаланасаҡтар. Эгоистик маҡсаттарҙа яуыз кешеләр тарафынан тыуҙырылған һуғыш шашынырыуына юл ҡуйған кешене беҙҙең балаларыбыҙ һәм беҙҙең балаларыбыҙҙың балалары хурлыҡ бағанаһына ҡаҙарҙар».

Чехословакияла һайлауҙар

ПРАГА, 30 май. (ТАСС). Һайлау районынан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, чех өлкәләрендә милли фронт исемлеге өсөн ... мең (89 процент) тауыш бирелгән. Аҡ бюллетендәр — 161 мең.

Словакиялағы 7 һайлау районы буйынса милли фронт исемлеге өсөн 71 мең (80 процент) тауыш бирелгән, аҡ бюллетендәр — ...

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

ПАРИЖ, 30 май. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһы хәбәр итеүенсә, Хайфанан хәбәр итеүенә ҡарағанда, еврейҙәрҙең һауа көстәре Наблус, Женин һәм Рам-Аллах ҡалаларын бомбаға тотҡандар.

Ғәрәп самолеттары еврейҙәрҙең Көнбайыш Галилейҙәге Нагария колонияһын бомбаға тотҡандар.

Франс Пресс агентствоһының хәбәренә Тель-Авивтан, еврейҙәр көрҙәре Палестинаның төньяғында уңышлы рәүештә һөжүм итеү операциялары алып баралар, тип хәбәр итә.

Аммандан хәбәр итеүҙәргә ҡарағанда, ҡаты һуғыштарҙан һуң Ирак ғәскәрҙәре еврейҙәрҙең Аффуленан 10 километр алыҫлыҡта урынлашҡан Зимиколонияһын алғандар. Ирак армияһының операциялары Назарет, Бейсан һәм Тиверид ҡалалары көньяғына табан барыусы иң ... һындағы секторҙар менән сикләнгән.

Иерусалимдан алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, иҫке Иерусалим ҡалаһындағы еврей кварталын эвакуациялау тамамланған. Артиллерия яңы Иерусалим ҡалаһында еврей ғәскәрҙәре тупланған пункттарҙы бомбаға тотоуын дауам иттергән.

Англия хөкүмәтенең Советтәр Союзына ҡарата политикаһы тураһында Англия общественносының фекере

ПРАГА, 31 май. (ТАСС). ... лепресс агентствоһы Лондондан Англиялағы общественность фекере институты тарафынан үткәрелгән анкета һөҙөмтәһендә Англия общественносының бөтә ҡатламын һорау үткәрелгән ... нең 68 процентенең «Англия хөкүмәтенең Советтәр Союзына ҡарата үткәргән политикаһын хуплайһығыҙмы?» тигән һорауға «юҡ» тип яуап биргән, тип хәбәр итә.

Үҙған йыл был һорауға ... алынған кешеләрҙән 26 проценты генә «юҡ» тип яуап биргәйне.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

КӨЙӨРГӘҘЕ ЗООВЕТТЕХНИКУМЫ

1948—49 уҡыу йылына уҡыусылар ҡабул итә

Техникум урта квалификациялы зооветтехниктар һәм ветеринарный фельдшерҙар әҙерләй. Техникумға урта мәктәптең йәки тулы булмаған урта мәктәптең 7 класын тамамлаған, 14—30 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм ирҙәр ҡабул ителәләр.

Уҡырға инергә теләүселәр, түбәндә күрһәтелгән документтарҙы беркетеп, үҙен мәктәпкә ҡабул итеү тураһында, директор исеменә, ғариза бирәләр:

а) тыуыуы тураһында метрика, б) 7 класты тамамлауы тураһында таныҡма, в) һаулығы тураһында таныҡма, г) паспорт һәм хәрби билет үҙе менән бергә алып килене.

Мәктәпкә ҡабул итеү өсөн ғаризалар, ошо йылдың 5 июненән 31 июлгә тиклем ҡабул ителәләр.

Уҡыу срогы 3 йыл.

Техникумға инеүселәргә түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар үткәреләсәк: рус теленән (телдән һәм диктант), математиканан (телдән һәм яҙма) һәм СССР Конституцияһы буйынса.

Техникумға ҡабул итеү өсөн һынауҙар 1 августан 20 августа тиклем дауам итәсәк. Уҡыуҙар 1 сентябрҙән башлана. Техникумға алынған кешеләр бөтәһе лә (беренсе курста, 140 һум, икенсе курста 160 һум, өсөнсө курста 180 һум күләмендә) стипендия менән тәьмин ителәсәктәр.

Отличниктарға стипендия 25 процентка артыҡ бирелә.

Тулы булмаған урта мәктәпте 1947—1948 уҡыу йылында, төп фәндәрҙән отличноға тамамлаусылар һынауһыҙ алыналар. Уҡыусылар уҡыған өсөн техникумға йылына 150 һум аҡса индерәләр (50 проценте мәктәпкә ингәндә һәм 50 проценте 1949 йылдың февралендә).

Уҡыу өсөн түләүҙән түбәндәге кешеләр ҡотҡарылалар: а) Совет Армияһынан ҡайтҡан кешеләр, б) Совет Армияһында хеҙмәт итеүселәрҙең тәрбиәһендәгеләр, в) пенсия алыусыларҙың балалары.

Техникумдың махсус столовойы бар.

Адрес: Башҡорт АССР-ы Ермолаевка, Көйөргәҙе районы, зооветтехникум.

Дирекция.

Мәжбүри окладной страхование тураһында

ССР Союзы Верховный Советенең 1940 йылдың 4 апрелендә ҡабул ителгән мәжбүри окладной страхование тураһындағы Законы һәм СССР Финанс Министерствоһының 1946 йыл 9 сентябрҙәге 614-се номерлә инструкцияһы нигеҙендә, 1948 йылдың 1 июненән Госстрах органдары бөтә ерҙә лә колхоздарҙа һәм граждандар хужалыҡтарында мәжбүри окладной страхование үткәрелергә тейешле объекттарҙы (төҙөлештәрҙе, малдарҙы, ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен һәм башҡа төр милектәрҙе) иҫәпләүгә тотоналар.

Иҫәпкә алыу тамамланыу менән, ләкин 1948 йылдың 1 сентябренән дә һуңға ҡалмайынса, үҙ милкен страховать иткән һәр бер кешегә түләнергә тейешле страховойҙың суммаһы һәм түләү срогы күрһәтелеп, страховой түләү тураһында таныҡма (белдереү) бирелә.

Страхование сборы түбәндәге сроктарҙа түләнә: колхоздар 1948 йылдың 15 сентябренә дөйөм страховой сумманың 40 процентен, 1 ноябргә—30 процентен һәм 1 декабргә—30 процентен индерәләр. Колхозсылар, эшселәр, хеҙмәткәрҙәр һәм башҡа граждандар 1948 йылдың 15 сентябренә 50 процентен, 1 ноябргә 50 процентен индерәләр.

Мәжбүри окладной страхование тәртибендә страховать ителгән милк зыянланған һәм зарарланған ваҡиғала госстрах күрелгән зыян өсөн аҡса түләй:

Төҙәлештәр страховать итеү буйынса, ә колхоздарҙа инвентарҙар, оборудованиелар, транспорт средстволары, продукция, сырье һәм материалдар страховать итеү буйынса — уттан, йәшен һуғыуҙан, шартлауҙан, ташҡындарҙан, ер тетрәүҙән, көслө дауылдарҙан, өйөрмәләрҙән, көслө ямғырҙарҙан, боҙ һуғыуҙан, емерелеү һәм башҡаларҙан килгән зыян өсөн; ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәрен страховать итеү буйынса — боҙ һуғыуҙан, көслө ямғырҙарҙан, дауылдарҙан, иңлыҡ ҡамылда саҡта яныуҙан, ер артыҡ дымлы булыу арҡаһында серегеүҙән, туңыуҙан, боҙолоуҙан, ҡырауҙан һәм ташҡындарҙан килгән зыян өсөн; малдар страховать итеү буйынса — ауырып һәм ҡартайып үлеүҙән, башҡа ҡазалар килеү сәбәпле иркһеҙ (ветеринар врачтың йәки ветеринар фельдшерҙең рөхсәте буйынса) һуйыуҙан килгән зыян өсөн госстрах аҡса түләй.

Страховать ителгән милктең көтөлмәгән бәлә-ҡазанан зыянлауы һәм зарарланыуы тураһында колхоздар — ауыл Советена йәки страховать итеү пунктына, ә колхозсылар — ауыл, район йәки ҡала Советена хәбәр итергә тейештәр.

ӨФӨ БИБЛИОТЕКА ТЕХНИКУМЫ

Беренсе курсҡа уҡыусылар ҡабул итә

Техникумға кәмендә 7 класс белемле 15 йәштән 35 йәшкә тиклем булған һәр ике енес граждандары ҡабул ителә.

Техникумға инеүселәр 7 йыллыҡ мәктәп программаһы күләмендә түбәндәге фәндәрҙән: СССР Конституцияһынан, рус теленән һәм әҙәбиәттән (телдән һәм яҙма), алгебранан (яҙма) һәм геометриянан (телдән) ҡабул итеү һынауҙары бирәләр.

Башҡорт, татар милләтенән булған уҡыусылар тыуған телдән һәм яҙмаса (башҡорт йәки татар телдәренән) һынау бирәләр.

7 йыллыҡ мәктәпте отличноға тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Техникумға инеүселәр директор исеменә ғариза бирәләр. Ғаризаға 7 йыллыҡ мәктәпте тамамлау тураһында аттестат (подлинниктә), баш кейемһеҙ төшкән өс фотокарточка, тыуыуы тураһында таныҡма (подлинниктә), сәләмәтлеге тураһында справка, военнообязанныйҙарға хәрби хеҙмәткә булған мөнәсәбәте тураһында справка һәм автобиография теркәлә.

Ғаризалар 1 августа тиклем ҡабул ителәләр. Ҡабул итеү экзамендәре 15 августан 25 августа тиклем. Уҡыуҙар 1 сентябрҙән башлана.

Ситтән килеүселәр һынауҙар осоронда дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәләр. Ҡабул ителеүселәрҙән мохтаж булғандары уҡыу осоронда ла дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәсәктәр.

Уҡыуҙан өлгөрөүселәр дөйөм нигеҙҙә стипендия менән тәьмин ителәләр. Уҡыу отличниктәре стипендияны 25 процентка артыҡ алалар.

Техникумдың адресе: Өфө ҡалаһы, М. Горький урамы, 43-сө номерлә йорт, телефон номере 2-81-85.

Дирекция.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00766. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

19-сы йыл сыға

1948 йыл № 110 4 июнь йома

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

1. СССР Министрзәр Советында. 1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производствола эш методтарын тамырынан уҡ камиллэштергән өсөн Сталин премиялары биреү тураһында. (1—2-се биттәр).

Коммунизм идеяларының бөйөк пропагандисе. (3-сө бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. Р. Хәбибуллина. — Тырыш хеҙмәт менән яулап алынған уңыштар. (3-сө бит).

Сәсеүҙе тиҙерәк тамамларға, урожай йыйынауға әҙерлек эштәрен киң йәйелдерергә! Х. Баимов. — Тағы ла яҡшыраҡ эшларгә, F. Идрисов. — Комбайндарҙы ремонтлауҙы өлгәлә ойоштороргә F. Ҡотлобаев. — Шефтар. (4-се бит).

Дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет-Финляндия договорының ратификацион грамоталарын алышыу. (4-се бит).

Бевиндең отставкаға сығыуы тураһында Дания газеталары. (4-се бит).

Яҙғы сәсеүҙе тиҙерәк тамамларға

Республикабыҙҙа яҙғы сәсеү сиктән тыш оҙаҡҡа һуҙылды. Иң яҡшы агротехник сроктарҙың үтеп китеүенә ҡарамаҫтан, 1 июнгә план ни бары 82,3 процентҡа ғенә үтәлде.

Сәсеүҙең барышы менән хәл ғәйәт тревогалы. Быйыл яҙ бик ныҡ ҡоро булды. Был шарт бөтә ауыл хужалығы работниктәренән сәсеүҙә ҡыҫҡа срок өсөн көрәште бер ваҡытта булмаған кеүек ойоштороуҙы талап итә ине. Ләкин был үҙенсәлеккә күп кенә райондарҙа ваҡытында тейешле иғтибарҙы бирмәнеләр һәм баҫыу эштәрен юғары темп менән алып барыу өсөн саралар күрмәнеләр. Арыш баш ҡоҫҡан ваҡытта ҡайһы бер урындарҙа хатта иртә культуралар сәсеү планының үтәлмәүен башҡа бер төрлө лә сәбәп менән аңлатырға мөмкин түгел.

Айырыуса Абзан, Архангель, Воскресен, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез райондары артта ҡалдылар. Уларҙа сәсеү планының үтәлеше ни бары 69—75 процент. Был райондарҙың партия, совет ойошмалары ла, ауыл хужалығы органдары ла, колхоз һәм МТС етәкселәре лә баҫыу эштәренең бөтә төрҙәрен үҙ ваҡытында үткәреүҙә большевистик яуаплылыҡ һиҙмәнеләр. Бөтә көс баҫыуҙарға күсерелмәне һәм тулы нагрузка менән файҙаланылманы. Яҙғы сәсеүҙең иң ҡыҙыу барған саҡтарында ла биш көнлек үҫеш 13—15 проценттән артманы. План үтәлеүҙән әле бик алыҫ булыуға ҡарамаҫтан, был райондарҙа һуңғы көндәрҙә лә эш аҡрын бара. Был хәл шулай уҡ сәсеү планын тулыһынса үтәү өсөн әле лә ныҡышмалы көрәштең булмауын күрһәтә.

Күп кенә райондарҙа һуңғы биш көнлектә темп хатта түбән төштө. Уңайһыҙ рәтенә беренсе нәүбәттә Ғафури, Йомағуҙа, Оло-Тиләк, Благовар, Саҡмағош райондары инәләр.

Сәсеүҙең аҡрын темп менән барыуына күп кенә урындарҙа яҙғы һөрөүҙең тейешенсә ойошторолмауы ҡомасаулай. Республика буйынса план ни бары 80,8 процентҡа ғенә үтәлде. Көйөргәҙе, Федоровка, Йомағуҙа райондарында биш көнлек үҫеш бары тик 9—13 процент кенә тәшкил итә. Әлбиттә, ошолай аҡрын һөргән саҡта сәсеү темпын да күтәрергә мөмкин түгел. Ләкин райондарҙың, МТС-тарҙың, колхоздарҙың етәкселәре был хәлде һуңғы көнгә тиклем иҫкә алмайҙар һәм һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн ер һөрөүҙе тейешенсә ойоштормайҙар.

Байтаҡ ҡына машина-трактор станциялары яҙғы сәсеүҙә һаман насар эшләүҙәрендә дауам итәләр. 1 июнгә трактор эштәренең яҙғы планын 50—60 процентҡа үтәгән Мәләүез, Һуҡайлы, Чапаев, Ергән, Архангель МТС-тарында тракторҙарҙың өстән бер өлөшө төрлө техник сәбәптәр менән тик тора. Колхоздар менән төҙөшкән договорҙар үтәлмәй. Ләкин был хәл айырым етәксе работниктәрҙе борсомай. Трактор паркын файҙаланыуҙы юлға һалыуҙа саралар күрелмәй.

Сәсеүҙә бындай артта ҡалыу түҙерлек хәл түгел. Хәҙер һәр бер көн генә түгел, һәр бер сәғәт һәм минут ваҡыт ҡәҙерле. Яҙғы сәсеү үҙенең иң ҡыйын осорона инде. Былар бөтәһе лә район, МТС һәм колхоз етәкселәренән сәсеүгә етәкселектә айырыуса көсәйтеүҙе талап итәләр. Бөтә көстө файҙаланырға һәм сәсеү планының һәр бер колхоз буйынса тулыһынса үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк. Айырыуса артта ҡалған колхоздарға ярҙамды көсәйтеү талап ителә. Был өлкәлә республикабыҙҙа яҙғы сәсеү планын беренсе булып үтәгән Туймазы районы өлгөһөнлә эшләргә кәрәк. Бында һәр бер колхозда эштең барышына ҡаты контроль булды. Тракторҙар һәм шулай уҡ йәнле тартыу көстәре тулы нагрузка менән эшләнеләр. Артта ҡалған колхоздарға алдынғылар тартыу көстәре, машиналар, инвентарҙар менән ярҙам иттеләр. Уларға иң яҡшы трактор бригадалары бирелде. Эш нормаларын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн колхозсылар, механизаторҙар араһында агит-массовый эш, социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Һөҙөмтәлә туймазылылар 30 майға бөтә һабан ашлыҡ культуралары сәсеүҙе тамамланылар.

Республикабыҙҙа һуңғы культуралар майҙаны ҙур ғына урын тота. Социалистик баҫыуҙарҙың хеҙмәтсәндәре арыш, бойҙай культураларынан юғары урожай алырға вәғәҙә иткән кеүек, тарыҙан, ҡара бойҙайҙан, йәшелсәләрҙән һәм техник культураларҙан да мул урожай алырға һүҙ бирҙеләр. Тимәк, был вәғәҙәне большевиктарса үтәү өсөн бөтә көстө туплаға кәрәк. Шул ваҡытта ғына сәсеү планы һәр бер колхоз буйынса үтәлер, 1948 йылда юғары урожай өсөн көрәштең беренсе этабы уңышлы тамамланыр.

Бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинга яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәү өсөн көрәште бер генә минутҡа ла йомшартырға ярамай. Хәҙер, сәсеү планын бөтә райондар буйынса бер нисә көн эсендә үтәүҙе тәьмин итеп, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшендә ныҡлы ойошторорға кәрәк. Һабан ашлыҡ культуралары, бигерәк тә ҡиммәтле бойҙай, өҫтәмә аҙыҡландырыуға һәм ҡый үләндәренән таҙартылыуға бик мохтаждар. Ерҙәге дымды тулыһынса сәсеүлектәр өсөн һаҡлау, өҫтәмә аҙыҡ матдаләре менән тәьмин итеү өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш. Шуның менән бергә колхоз ауылында хәҙер көстө пар күтәреүҙе 10 июнгә тулыһынса тамамларға һәм урожай йыйынауға әҙерлекте киң йәйелдереүгә туплаға кәрәк.

БАССР Министрзәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Алдынғыларға күсмә Ҡыҙыл Байраҡтар бирелде

БАССР Министрзәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы май айының алтынсы биш көнлеге өсөн яҙғы сәсеү барышындағы йомғаҡтарын ҡараны һәм түбәндәге райондарҙы социалистик ярышта еңеүселәр тип билдәләне:

1. Яҙғы сәсеү планын 100,6 процентҡа үтәгән һәм республикала беренсе урынды алған Туймазы районы (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Баранов, район Советы исполкомы председателе иптәш Абдуллин, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Садиков). БАССР Министрзәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы был районда ҡалдырылды.

2. Яҙғы сәсеү планын 96,3 процентҡа үтәгән һәм республикала икенсе урынды алған Яңауыл районы (ВКП(б) райкомы секретары иптәш Ғәлиев, район Советы исполкомы председателе иптәш Кәримов, район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Закиров). БАССР Министрзәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы Салауат районынан алынып, Яңауыл районына бирелде.

3. Яҙғы сәсеүҙә районлар ярышындағы өсөнсө урынды Белорет районы алды. Ул 1 июнгә яҙғы сәсеү планын 96,1 процентҡа үтәне. БАССР Министрзәр Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағы был районда ҡалдырылды.

Майҙың алтынсы биш көнлегендә яҙғы сәсеүҙә Салауат, Балтас, Покровка, Ҡаиҙра райондары яҡшы эшләнеләр, тип билдәләнеләр.

СССР Министрзәр Советында

1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производствола эш методтарын тамырынан уҡ камиллэштергән өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

СССР Союзы Министрзәр Советы 1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производствола эш методтарын тамырынан уҡ камиллэштергән өсөн Сталин премияларын биреү тураһында **ҡарар итте:**

150.000 һум күләмендә БЕРЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Игнатов** Николай Николаевичкә — эштәр етәксеһе, Көнбайыш райондарындағы күмер промышленносе Министерствоһының инженерына, **Картозия** Арчилд Теймуразовичкә — Көнбайыш Главшахтастрой начальнигенә, **Хорунжем** Валентин Алексеевичкә — «Сталинуголь» комбинатының баш механигенә, **Седов** Борис Яковлевичкә — «Ворошиловградуголь» комбинатының баш механигенә, **Прохоров** Василий Дмитриевичкә — «Артемуголь» комбинатының баш механигенә, **Мелеги** Михаил Сергеевичкә — «Ростовуголь» комбинатының баш механигенә, **Расевский** Павел Антоновичкә — Донбасса Главуглемашты аяҡҡа баҫтырыу бюроһы начальнигенә, **Гейер** Виктор Георгиевичкә — Донец-индустриаль институтының доцентенә, **Мартынов** Василий Александровичкә — Донбастағы шахталарҙы аяҡҡа баҫтырыу главкының баш механигенә, **Черкавкин** Николай Никоновичкә — Көнбайыш райондарындағы күмер промышленносе Министерствоһының шахталарҙы һыуҙан бушатыу бүлеге начальнигенә, **Каминский** Давид Наумовичкә — яғыулыҡ предприятиеларын төҙөү Министерствоһының баш механигенә, **Жербин** Михаил Михайловичкә — Донбасстағы Үҙәк копер бюроһы начальнигенә, **Шахмейстер** Лев Григорьевичкә — Көнбайыш Гипроуглемашының күтәреү машиналары конструкторҙар бюроһы начальнигенә, **Александров** Борис Филипповичкә — Көнбайыш Гипроуглемашының баш конструкторына, **Бреславский** Михаил Тихоновичкә — ЛКСМУ-ның 15 йыллығы исемендәге Сталинск машиналар төҙөү заводының баш конструкторына, **Тулин** Вячеслав Семеновичкә — Электр промышленносе Министерствоһының Проект-аяҡҡа баҫтырыу трестының тау электроприбор буйынса баш конструкторына, **Старовойский** Валентин Романовичкә—658-се номерле заводтың элекке баш конструкторына, — Донбастағы һыуға батырылған шахталарҙы һыуҙан бушатыу буйынса алдынғы методтарҙы эшләп, уларҙы үҙләштергән һәм тау оборудованиеһын аяҡҡа баҫтырған өсөн; был методтар Донбасс бассейнын аяҡҡа баҫтырыу темптарын байтаҡ тиҙләтте.

2. **Касьянов** Владимир Тихоновичкә — эштәр етәксеһе, профессор, С. М. Киров исемендәге «Электросила» заводының консультантына, **Лютер** Роберт Андреевичкә, **Шапиро** Давид Вениаминовичкә, **Рабинович** Исай Натановичкә, **Кашин** Алексей Алексеевичкә — шул уҡ заводтың инженерҙарына, — даими токта эшләүсе эре электр машиналарын төҙөгән өсөн.

3. **Лавочкин** Семен Алексеевичкә—Социалистик Хеҙмәт Геройына, самолеттар төҙөү буйынса баш конструкторға, — яңы тип боевой самолеттар төҙөгән өсөн.

4. **Люльев** Лев Вениаминовичкә — М. И. Калинин исемендәге 8-се номерле заводтың баш конструкторына, **Малков** Всеволод Аркадьевичкә, **Новосельцев** Анатолий Михайловичкә, **Родионов** Виктор Васильевичкә, **Гинзбург** Александр Тановичкә — шул уҡ заводтың инженерҙарына, **Попов** Петр Михайловичкә — инженер-полковникка, **Белоостров** Александр Петровичкә — 13-сө номерле заводтың элекке инженер-конструкторына, — яңы тип пушка уйлап сығарған өсөн.

5. **Макаров** Сергей Константиновичкә — авиация яғыулыҡтары һәм майҙары Үҙәк институтының баш инженерына, **Америк** Борис Карповичкә — Грозный нефть фәнни-тикшеренеү институтының бүлек начальнигенә, эштәр етәкселәренә, **Молдавский** Борис Львовичкә — Ленинградтың юғары баҫымдар институты профессорына, **Пигузова** Лидия Ивановнаға — авиация яғыулыҡтары һәм майҙары Үҙәк институтының ғилми сотрудницаһына, **Оркина** Зинаида Георгиевнаға, **Лазарьянц** Константин Георгиевичкә — Грозный нефть фәнни-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына, **Федоров** Виктор Степановичкә, — Көнсығыш һәм көнбайыш райондары нефть промышленносе министрының урынбаҫарына, **Штейнгольц** Израил Иосифовичкә — «Нефтезаводпроект» тресының баш инженерына, **Бочаров** Иван Васильевичкә — 867-се номерле заводтың инженер-технологына, — юғары сифатлы бензин етештереүҙе байтаҡ киңәйтеүҙе тәьмин иткән, нефть продукттарын алыуҙың методтарын тамырынан камиллэштергән өсөн.

6. **Микоян** Артем Ивановичкә, **Гуревич** Михаил Иосифовичкә — самолеттар төҙөү буйынса баш конструкторҙарға, — яңы типтағы боевой самолет төҙөгән өсөн.

7. **Струминский** Владимир Васильевичкә — Н. Е. Жуковский исемендәге Үҙәк аэрогидродинамика институты профессорына — самолеттарҙа яңы типтағы ҡанаттар төҙөгән өсөн.

8. **Туполев** Андрей Николаевичкә — Социалистик Хеҙмәт Геройына, СССР Фәндәр академияһының член-корреспондентына, самолеттар төҙөү буйынса баш конструкторға, — яңы типтағы боевой самолет төҙөгән өсөн.

9. **Юдин** Сергей Сергеевичкә — СССР Медицина Фәндәр академияһының действительный членына, Мәскәүҙең Склифасовский исемендәге ҡала ашығыс ярҙам күрһәтеү фәнни-тикшеренеү институтының баш хирургына — аш үткәрә торған юлдың хирургияһының яңы методтарын эшләп сығарыу өсөн.

10. **Яковлев** Александр Сергеевичкә — Социалистик Хеҙмәт Геройына, СССР Фәндәр академияһының член-корреспондентына, самолет төҙөү буйынса баш конструкторға, — яңы типтағы боевой самолет төҙөгән өсөн.

100.000 һум күләмендә ИКЕНСЕ дәрәжәләге премиялар

1. **Ламисепп** Юлиус Сяймовичкә — Эстония ССР Фәндәр академияһының член-корреспонденте, Йыгев государственный селекцион станцияһының селекция бүлеге мөдиренә,—картуфтың рак ауырыуына ҡаршы тороусанлы: Калов, Күнгла, Йыгева, Вирулана, Линда тигән яңы сорттарын булдырған өсөн, был сорттар Эстон ССР-ында һәм РСФСР, БССР-ҙың күп кенә өлкәләрендә киң таралған.

2. **Антонов** Николай Петровичкә — М. В. Фрунзе исемендәге 7-се номерле заводтың баш конструкторына, **Герот** Вадим Михайловичкә — шул уҡ заводтың баш инженерына, **Лендер** Владимир Францевичкә, **Капустин** Поликарп Гордеевичкә — шул уҡ заводтың инженерҙарына, — артиллерия ҡоралының яңы өлгөләрен барлыҡҡа килтергән өсөн,

3. **Бурцев** Константин Ивановичкә — эштәр етәксеһе, Магнитогорск металлургия комбинатының баш инженерына, **Хусид** Соломон Ефимовичкә, **Ситков** Михаил Андреевичкә, **Сыгин** Виктор Григорьевичкә, **Лаур** Густав Карловичкә — шул уҡ комбинаттың инженерҙарына, **Челюсткин** Александр Борисовичкә — «Энергочермет» тресының Үҙәк автоматика лабораторияһы инженерына, — прокат станын комплексле автоматлаштырыу схемаһын эшләп сығарған һәм уны тормошҡа ашырған өсөн, Был прокат станының етештереүсәнлеген байтаҡ күтәреүҙе һәм прокаттың браҡҡа сығыуын кәметеүҙе тәьмин итте.

4. **Васильев** Александр Васильевичкә — эштәр етәксеһенә, Бөтә Союз малсылыҡ ғилми-тикшеренеү институтының өлкән ғилми сотрудникенә, **Ватагин** Владимир Александровичкә — Куйбышев өлкә ауыл хужалығы управлениеһының тоҡом малы эше буйынса өлкән инспекторына, **Некрасов** Дмитрий Андреевичкә — Кошкинск Государство тоҡом малы рассаднигының өлкән зоотехнигенә, **Ежов** Николай Николаевичкә — Куйбышев өлкәһе, Кутузов районы «14 лет Октября» колхозы һарыҡсылыҡ фермаһының өлкән чабанына,—«Куйбышевская» исемендәге ит һәм йөн биреүсе яңы тоҡом һарыҡтар үрсеткән өсөн.

5. **Васильев** Алексей Михайловичкә — Мәскәү 2-се сәғәт заводының станоктар төҙөү цехының начальнигы, эштәр етәксеһенә, **Галлай** Анатолий Андреевичкә — Мәскәү иҫәпләү һәм яҙыу машиналары заводының инженерына, **Неклюдов** Григорий Ивановичкә, **Чернов** Николай Васильевичкә — машиналар төҙөлөшө һәм приборҙар төҙөлөшө Министерствоһының Махсус конструктор бюроһы инженерҙарына, **Жардини** Эдуард Петровичкә, **Тарасов** Сергей Васильевичкә — шул уҡ Министерствоның инженерҙарына, — яңы махсус станоктар конструкцияһын эшләүҙәре һәм уларҙы күпләп эшләп сығарыуҙы үҙләштереүҙәре өсөн.

6. **Гальперин** Владимир Григорьевичкә — эштәр етәксеһенә, **Аристархов** Серафим Алексеевичкә, **Белянин** Борис Владимировичкә — Н. Е. Жуковский исемендәге Үҙәк аэрогидродинамика институтының ғилми сотрудниктарына, — аэродинамик һынауҙар производствоһына яңы аппаратура эшләп сығарыуҙары өсөн.

7. **Гельперин** Иосиф Ильичкә — эштәр етәксеһе, азот промышленносе Государство институтының техник бүлек начальнигенә, **Челобова** Софья Петровнаға, **Павлов** Владимир Николаевичкә — шул уҡ институттың инженерҙарына, **Мишенков** Григорий Васильевичкә — Березниковск азот-туковый заводының баш инженерына, **Савцов** Александр Ивановичкә—Сталиногорск химик комбинаты инженерына, — химик продукттарҙы алыу технологияһын тамырынан камиллаштереүҙәре өсөн.

8. **Герсеванов** Николай Михайловичкә — СССР Фәндәр академияһының член-корреспондентына, **Абелев** Юде-Лев Мордуховичкә—профессорға, — ваҡ бөртөклө тупраҡлы грунт шарттарында төҙөлештең яңы методтарын эшләп сығарыуҙары һәм практикаға индереүҙәре өсөн.

9. **Горев** Александр Александровичкә — эштәр етәксеһе, М. И. Калинин исемендәге Ленинград политехник институты профессорына, **Гессен** Виктор Юльевичкә, **Карпов** Николай Ивановичкә, **Каплан** Вениамин Вульфовичкә — шул уҡ институттың ғилми сотрудниктарына, **Булгаков** Константин Ефремовичкә «Электроаппарат» заводының баш инженерына, — юғары вольтле аппаратураларҙы һынау методтарын эшләгәндәре һәм ул аппаратураларҙы һынау буйынса установка төҙөгәндәре өсөн.

10. **Динцес** Абрам Ильичкә — эштәр етәксеһенә, **Ложкин** Леонид Павловичкә, **Монастырский** Виктор Николаевичкә, **Непомнящий** Владимир Антоновичкә, **Федоров** Федор Васильевичкә —авиация яғыулыҡтары һәм майҙары Үҙәк институтының ғилми сотрудниктарына, — химик продукттар алыуҙың промышленность ысулын табыуҙары өсөн.

11. **Дмитриевский** Валериан Степановичкә — эштәр етәксеһенә, **Кассацнер** Абрам Самойловичкә, **Манишер** Георгий Семеновичкә, **Назаров** Александр Карповичкә, **Трофимов** Константин Васильевичкә— 18-се номерле Үҙәк конструкторҙар бюроһының инженерҙарына — боевой караптар өсөн яңы двигатель төҙөгәндәре өсөн.

12. **Константинов** Вячеслав Александровичкә — эштәр етәксеһенә, **Новиков** Борис Николаевичкә, **Макаров** Петр Павловичкә, **Храмцов** Александр Алексеевичкә — 800-сө номерле заводтың инженерҙарына, **Махарадзе** Арчил Филипповичкә—инженер-полковникка, — боевой караптарҙың двигателен тамырынан камиллаштерган һәм уны суднолар төҙөү эшенә индергән өсөн.

(Дауамы 2-се биттә).

СТАЛИН ПРЕМИЯЛАРЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

В. В. СТРУМИНСКИЙ. С. С. ЮДИН. А. И. АЛИХАНОВ. А. С. ЯКОВЛЕВ. Т. А. САРЫМСАКОВ.

СССР Министрҙәр Советендә

1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производствола эш методтарын тамырынан уҡ камилләштергән өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

13. **Катин** Жозеф Яковлевичка — Социалистик Хеҙмәт Геройы, Ленинградтың Киров заводының баш конструкторына, **Сычев** Леонид Ефимовичка, **Курин** Николай Васильевичка, **Марищкин** Федор Антоновичка, **Каргаполов** Вениамин Александровичка — шул уҡ заводтың инженер-конструкторҙарына — ағас яғып торған яңы трактор төҙөгәндәре өсөн.

14. **Кужель** Николай Дмитриевичка — эштәр етәксеһенә, **Башилов** Иван Яковлевичка, **Селиверстов** Николай Степановичка, **Арасланова** Наилә Ҡаюм ҡыҙына, **Блинова** Евгения Александровнаға, **Лапин** Юрий Дмитриевичка, **Рожков** Павел Ивановичка — 169-сы номерле заводтың инженерҙарына — ҡиммәтле металдарҙы таҙартыуға яңы методтар уйлап тапҡандары һәм уны производствоға индергәндәре өсөн.

15. **Макаров** Семен Семеновичка — эштәр етәксеһе, Көнсығыш Гипроуглемаштың СКБ начальнигенә, **Коленцев** Михаил Тимофеевичка — Көнсығыш Гипроуглемаштың баш конструкторына, **Сердюк** Александр Калиновичка — Көнбайыш Гипроуглемаштың СКБ начальнигенә, **Егоров** Леонид Васильевичка—31-се номерле шахта начальнигенә, **Малиованов** Даниил Исааковичка — «Союзвосток-шахтпроект» берекмәһенең инженерына, **Денисов** Павел Павловичка — Көнсығыш Гипроуглемаштың СКБ группаһы начальнигенә, — оҙон забойҙарҙағы транспортерҙа күмерҙе бер үк ваҡытта киҫеү, ватыу һәм тейәү өсөн Макаров системаһындағы юғары етештереүсәнлекле комбайндың конструкцияһын эшләгән һәм производствоға индергән өсөн.

16. **Морозов** Александр Александровичка — Социалистик Хеҙмәт Геройы, 183-сө номерле заводтың баш конструкторына, **Кучеренко** Николай Алексеевичка, **Колесников** Анатолий Васильевичка, **Матюхин** Василий Григорьевичка, **Васильев** Петр Петровичка — шул уҡ заводтың инженерҙарына — яңы танк уйлап сығарған өсөн.

17. **Мошкин** Пантелеймон Афанасьевичка — эштәр етәксеһе, Фрунзе исемендәге институттың ғилми-тикшеренеү лабораторияһы начальнигенә, **Дурнов** Абрам Лейбовичка, **Игонин** Леонид Андреевичка, **Куценко** Арон Иосифовичка — шул уҡ институттың ғилми сотрудниктарына, **Акутин** Модест Сергеевичка — Кусковск химик заводының баш инженерына, **Дубинин** Борис Михайловичка — СССР Фәндәр академияһының органик химия институтының өлкән сотрудникенә, — яңы химик продукттар эшләп сығарғандары һәм производствоға индергәндәре өсөн.

18. **Мурашов** Дмитрий Федоровичка, — эштәр етәксеһе, геология-минералогия фәндәре докторы, Ленинградтағы геологик управлениенең геологына, **Шифрин** Давид Вельковичка, геология Министерствоһының ҡара металдар бүлеге начальнигенә, **Кошиц** Константин Михайловичка, Ленинград государство университетенең ассистентенә, — Кольск ярым утрауында төньяҡ-көнбайыш ҡара металлургияһы өсөн тимер рудаһының сырьё базаһын төҙөүҙе тәьмин итеүсе тимер рудаһының ҙур ятышын асҡан өсөн.

19. **Пилль** Михкель Петровичка, —Эстон ССР-ы Фәндәр академияһының член-корреспонденте, Ыйгевск государство селекция станцияһының директорына, — бөртөклө ашлыҡ культураларының юғары урожайлы яңы сорттарын: Ыйгев 1 сортлы ужым арышын, луунья сортлы ужым бойҙайын, Ыйгев Каук сортлы яҙғы бойҙайҙы, Ыйгев 453 сортлы арпаны үрсеткән өсөн.

20. **Сафонов** Константин Евгеньевичка — эштәр етәксеһенә, **Волков** Константин Михайловичка, **Горенштейн** Азар Борисовичка — торф промышленносе Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына, **Варенцов** Владимир Семеновичка — Главторфтың инженерына, — фрезер торфын сығарыуҙа юғары етештереүсәнлекле машина эшләгәндәре һәм производствоға индергәндәре өсөн.

21. **Соколов** Тарас Николаевичка — эштәр етәксеһенә, **Дружинский** Исаак Абрамовичка, **Верин** Иван Ивановичка, **Разыграев** Аркадий Михайловичка, **Назаров** Анатолий Гавриловичка — Свердлов исемендәге станоктар төҙөү заводының инженерҙарына, — үҙ Ватаныбыҙҙың электро-копировально-фрезер автоматының конструкцияһын эшләгәндәре һәм производствола үҙләштергәндәре өсөн.

22. **Сыромятников** Иван Аркадьевичка, — эштәр етәксеһе, электр станциялары Министерствоһының техник бүлеге начальнигенең урынбаҫарына, **Розенберг** Борис Исааковичка — Теплоэлектропроекттың Ленинградтағы бүлегенең баш электригенә, **Небрат** Лев Ефремовичка, **Ясников** Владимир Николаевичка — «Кемеровэнерго» инженерҙарына, **Лысаковский** Георгий Иосифовичка—«Донбасэнерго» инженерына, — электр биреү линияһына фазалап ремонт яһау методын эшләгән һәм производствоға индергәндәре өсөн.

23. **Феляевский** Константин Константиновичка, — эштәр етәксеһенә, **Веселовский** Михаил Николаевичка, **Добровольский** Андрей Николаевичка, **Перельмутр** Александр Семеновичка, **Эпштейн** Леонид Абрамовичка — Н. Е. Жуковский исемендәге Үҙәк аэрогидродинамика институтының ғилми сотрудниктарына, — боевой карапталарҙың йөрөү тиҙлеген арттырыу методтарын эшләгәндәре һәм практикаға индергәндәре өсөн.

24. **Хельквист** Герман Августовичка, — көньяҡ һәм көнбайыш райондары нефть промышленносе Министерствоһының промышленный разведка һәм промысловый геология баш управлениеһенең начальнигенә, **Андрейко** Виктор Федотовичка — «Краснодарнефть» берекмәһенең баш геологына, **Бальзамов** Михаил Ивановичка — «Краснодарнефтеразведка» тресының баш геологына, **Герцик** Эдмунд Рафаиловичка — «Краснодарнефть» берекмәһенең начальнигенә, — нефть эҙләү методтарын тамырынан камилләштергәндәре һәм был методтың яңы нефть ятыштарын асыуға килтергәне өсөн.

25. **Шапировский** Натан Ильичка —эштәр етәксеһенә, **Куликов** Виктор Ивановичка, **Рапопорт** Соломон Яковлевичка, **Рудаев** Виктор Николаевичка — Көнсығыш райондары нефть промышленносе Министерствоһының Бөтә Союз государство геофизик тресының Азербайжан бүлеге инженерҙарына, — диңгеҙҙә сейсмик разведка яһау методын эшләгәндәре һәм производствоға индергәндәре өсөн.

26. **Шлыков** Михаил Ивановичка — эштәр етәксеһе, ауыл хужалығын механизациялау һәм электрификациялау Мәскәү институтының доцентына, **Маят** Александр Сергеевичка — ауыл хужалығы машиналары төҙөү Люберцы заводының баш инженерына, **Моисеев** Александр Сергеевичка — ауыл хужалығы машиналары төҙөү Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институты директорының урынбаҫарына, — «ЛК—7» етен йыйнау комбайнын төҙөгән өсөн.

27. **Ясногородский** Игош Зельмановичка — Алтай трактор заводының Үҙәк лабораторияһы начальнигенең урынбаҫарына, **Харитонов** Вениамин Семеновичка — шул уҡ лабораторияның начальнигенә, — металдарҙы электрик менән ҡыҙҙырыу һәм электролитта эретеүҙә эффектлы метод тапҡандары өсөн.

50.000 һум күләмендә ОСӨНСӨ дәрәжәләге премиялар

1. **Анкинович** Степан Герасимовичка — эштәр етәксеһенә, **Анкинович** Екатерина Александровнаға, **Смирняков** Николай Викторовичка — Ҡазағстан геологик управлениеһенең Николаевскиҙағы партияһы сотрудниктарына, **Казанцев** Михаил Ивановичка, **Вьюнов** Федор Ивановичка — «Алтайцветметразведка» тресының Николаевскиҙағы партияһы сотрудниктарына, — Николаевский полиметалл ятышын геологик яҡтан тикшергән һәм разведка яһаған өсөн.

2. **Бабаджанян** Мария Аракеловнаға — эштәр етәксеһе, Ереванлағы быяла һауыттар эшләү заводының баш инженерына, **Минасян** Валентин Спиридоновичка— Ереванлағы электрик машиналары төҙөү заводы директорының урынбаҫарына, — **Энтелис** Федор Семеновичка — Ереванлағы быяламуллит заводы тәжрибәһенең баш инженерына, — мейестәрҙе конструкция һәм быяланы электротермик юл менән эретеүҙә яңы метод эшләп сығарғандары өсөн.

3. **Байбаков** Александр Борисовичка — эштәр етәксеһенә, **Солдак** Георгий Филипповичка, **Зейгермахер** Израил Львовичка, **Кальнето** Николай Трофимовичка, **Остафьев** Александр Ивановичка — «Ленинская кузница» заводының инженерҙарына, — камилләштерелгән стандарт конструкциялағы йылға буксирен уйлап сығарғандары һәм уны производствоға индергәндәре өсөн.

4. **Баренбайм** Исаак Юлисовичка — Социалистик Хеҙмәт Геройы, эштәр етәксеһе, юл эштәре Министерствоһы Мостотресының 2-се номерле күпер төҙөү отряде начальнигенә, **Балецкий** Виктор Макаровичка, **Зингаренко** Григорий Исааковичка, **Карениикий** Николай Георгиевичка, **Константинов** Борис Петровичка, **Константинов** Михаил Николаевичка, **Ратнер** Георгий Петровичка, **Сапрыкин** Леонид Дмитриевичка, **Силин** Николай Александровичка, **Снитковский** Израил Ароновичка, **Тарусин** Николай Евстегнеевичка — Киев күперен төҙөүсе инженерҙарға, — гидромеханизацияны, кессонный эштәрҙе тамырынан уҡ камилләштергәндәре өсөн, был, эштең үҙенә төшөү хаҡын ныҡ киҫкен рәүештә кәметеүҙе, хеҙмәт шарттарын яҡшыртыуҙы һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙе тәьмин итте.

5. **Богомолов** Константин Сергеевичка — эштәр етәксеһе, ғилми-тикшеренеү кинофотоинститутының өлкән ғилми сотрудникенә, **Яковлева** Тамара Борисовнаға — ВВС НИИ-зең өлкән инженерына, **Кузнецова** Антонина Александровнаға — 5-се номерле фабриканың цех начальнигенә,—яңы тип фотопленкалар уйлап сығарып, уны промышленносҡа индергәндәре өсөн.

6. **Бондаренко** Михаил Владимировичка, **Дмитриев** Михаил Дмитриевичка — үҙәк ғилми-тикшеренеү ҡағыҙ институты сотрудниктарына, — техник ҡағыҙ етештереүҙең яңы юлдарын уйлап сығарған һәм уны промышленносҡа индергәндәре өсөн.

7. **Бочаров** Михаил Степановичка — эштәр етәксеһенә, **Гуцунаев** Вадим Константиновичка, **Блох** Гирш Абрамовичка, **Чернухин** Шолом Яковлевичка — торф промышленносеның Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының фәнни сотрудниктарына, — торфлы һаҙлыҡтарҙы киптерә торған яңы машиналар һәм методтар уйлап сығарғандары өсөн.

8. **Брауде** Гирш Вульфовичка— В. И. Ленин исемендәге Бөтә Союз электротехник институтының профессорына, — радио приборҙарына конструкция яһауҙың яңы методтарын эшләп сығарғаны өсөн.

9. **Веллер** Владимир Николаевичка — эштәр етәксеһе, Ф. Э. Дзержинский исемендәге Бөтә Союз теплотехник ғилми-тикшеренеү институтының өлкән ғилми сотрудникенә, **Щегляев** Андрей Владимировичка, **Киракосянц** Гертруд Александровнаға — шул уҡ институттың ғилми сотрудниктарына, — пар турбиналарын регулировать итеүҙең гидродинамик системаһын эшләп сығарғандары өсөн.

10. **Володин** Алексей Павловичка — эштәр етәксеһе, тау-руда ғилми-тикшеренеү институтының тау бүлеге начальнигенә, **Малахов** Георгий Михайловичка — Кривой Рогтағы тау-руда институтының доцентына, **Миняйло** Александр Афанасьевичка — «Кривбассруда» тресының баш механигенә, **Полищук** Афанасий Дмитриевичка — Дзержинский исемендәге шахтоуправлениеһенең баш инженерына, **Волков** Федор Ивановичка—«Коммунар» шахтаһы мөдиренә, **Бриндза** Николай Марковичка—Главрудаһының техник бүлек начальнигенә, — Кривой Рог тимер рудаһы бассейне шарттарында юғары етештереүсәнле ҡатламлы мәжбүри емертеү системаһы уйлап сығарғандары һәм уны производствоға индергәндәре өсөн.

11. **Гадеев** Александр Александровичка — эштәр етәксеһе, Мәскәү тау институты профессорына, **Кушев** Георгий Леонтьевичка, **Медоев** Георгий Цараевичка,—Ҡазаҡ ССР-ы Фәндәр академияһы геология институтының өлкән ғилми сотрудниктарына, **Семенова** Зинаида Петровнаға — «Казахуглеразведка» тресының геологына, — Ҡараганда күмер бассейнендә коксланыусы күмерҙәрҙең яңы участкаларын асыуҙы тәьмин итеүсе геологик тикшеренеүҙәре өсөн.

12. **Гармашев** Александр Фомичка — эштәр етәксеһенә, **Сигин** Леонид Сергеевичка, **Ходос** Петр Михайловичка — Маркуполлен Ильич исемендәге завод инженерҙарына, **Волошкевич** Георгий Засимовичка — Украин ССР-ы Фәндәр академияһының электросварка институтының ғилми сотрудникенә, — тимер юл цистерналарын етештереү технологияһын тамырынан уҡ камилләштергәндәре өсөн.

13. **Гефен** Нина Ефимовнаға — медицина фәндәре докторы, РСФСР һаулыҡ һаҡлау Министерствоһының Мәскәү медицина институтының ассистентына, **Александров** Николай Ивановичка — медицина хеҙмәте подполковнигенә, — яңы төр вакциналар уйлап сығарғандары һәм уны практикаға индергәндәре өсөн.

14. **Гоголев** Федор Тимофеевичка — ауыл хужалығын механизациялау һәм электрификациялау Бөтә Союз институты инженерына, — ауыл хужалығында киң ҡулланылған иген киптергестең яңы конструкцияһын эшләп сығарғаны өсөн.

15. **Горецкий** Борис Константиновичка — РСФСР ауыл хужалығы Министерствоһының инкубатор-кошсолоҡ станцияларының баш управлениеһе начальнигенә— автоматик рәүештә идара ителә торған ҡеүәтле яңы электрик инкубатор конструкцияһын эшләп сығарғаны өсөн.

16. **Гринберг** Марк Иосифовичка — профессор, Ленинградтың И. В. Сталин исемендәге металл заводының пар турбиналары баш конструкторына, **Антонов** Александр Гавриловичка, **Бушуев** Михаил Николаевичка, **Егоров** Владимир Петровичка, **Зильберман** Александр Сергеевичка, **Зубк** Виталий Никитичка, **Левин** Арон Вульфовичка, **Ломакин** Александр Александровичка, **Хейфец** Моисей Залмановичка, — шул уҡ заводтың инженерҙарына, — минутына 3000 әйләнешле, 100 мең киловатт ҡеүәтлегендә юғары баҫымлы пар турбинаһы конструкцияһын һәм уны етештереү технологияһын уйлап сығарғандары өсөн.

17. **Громачевский** Всеволод Никитичка — Азербайжан государство селекция станцияһының өлкән сотрудникенә — көҙгө бойҙайҙың урожайлылыҡ яғынан урындағы стандарт сорттарҙан 25—30 процентҡа юғары урожай биреүсе яңы сорттарын: хоранка, арандаңы, шарҡ сорттарын үрсеткәне өсөн.

18. **Гуревич** Борис Максовичка —эштәр етәксеһе, Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү күмер институтының өлкән ғилми сотрудникенә, **Бучнев** Валериан Константиновичка, — шул уҡ институттың директорына, **Мессермен** Залман Гиршевичка — В. М. Молотов исемендәге Мәскәү энергетика институтының доцентына,—электровоздарҙың аккумулятор батареяларын тәрән ер аҫтында зарядлауҙа яңы устройство эшләп сығарғандары өсөн.

19. **Гусев** Владимир Николаевичка — эштәр етәксеһенә, **Боград** Исаак Яковлевичка, **Гусев** Николай Николаевичка, **Крыжановский** Павел Сергеевичка, **Шипулин** Павел Петровичка — 13-сө номерле ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына, — металл эшкәртеүҙең яңы методын уйлап сығарыуҙары һәм производствоға индереүҙәре өсөн.

20. **Гутенмахер** Лев Израилевичка — профессор, СССР фәндәр академияһы энергетика институтының электромоделировать итеү лабораторияһы мөдиренә, **Корольков** Николай Владимировичка — шул уҡ институттың ғилми сотрудникенә, **Волынский** Борис Абрамовичка — Бөтә Союз автоматика ғилми-тикшеренеү институтының иҫәпләү механизмдары лабораторияһының ғилми етәксеһенә, **Лебедев** Василий Павловичка — шул уҡ институттың директорына, —яңы иҫәпләү аппараты—электроинтергратор төҙөүҙәре өсөн.

21. **Дамский** Абрам Марковичка — 531-се заводтың директорына, **Селивер** Борис Абелевичка, **Воскобойник** Николай Израиловичка — шул уҡ заводтың инженерҙарына, **Арутюнов** Валентин Осиповичка — СССР Фәндәр академияһы докторантына,—яңы инерцион осциллографтарҙың конструкцияларын уйлап сығарғандары һәм күпләп эшләп сығарыуҙы үҙләштереүҙәре өсөн.

22. **Дмитриев** Сергей Федоровичка — эштәр етәксеһе, СССР Медицина Фәндәре академияһының малярия, медицина паразитологияһы һәм гельминтологияһы институты профессорына, **Сутеев** Григорий Осиповичка, **Асиин** Давид Иосифовичка, **Фирюкова** Мария Васильевнаға — шул уҡ институттың ғилми сотрудниктарына, — актиномикозды дауалауға препарат уйлап сығарыуҙары һәм уны практикаға индереүҙәре өсөн.

23. **Дорофеев** Петр Иннокентьевич — эштәр етәксеһенә, **Есипов** Павел Михайловичка, **Лахтионов** Олег Владимировичка—Урал геология управлениеһенең инженерҙарына, **Тюрин** Андрей Петровичка— «Свердловск-углегеология» тресының Төньяҡ-Урал партияһының өлкән геологына, **Тарханеев** Борис Федоровичка — «Свердловск-углеразведка» тресының баш инженерына, **Мезинцев** Александр Васильевичка — шул уҡ тресттың Волчая геология разведкаһы партияһының начальнигенә, — Урта уралда яңы ҡеүәтле күмер энергетика базаһы булдырыуҙы тәьмин иткән Волчаң таш күмер ятышын геологик тикшереүҙәре һәм разведкалауҙары өсөн.

24. **Ефремов** Дмитрий Васильевичка — СССР электр промышленносе министре урынбаҫарына, **Комар** Евгений Григорьевичка, **Титов** Владимир Викторовичка, **Данилов** Константин Владимировичка, **Карташев** Евгений Ивановичка — С. М. Киров исемендәге «Электросила» заводының инженерҙарына, — минутына 3000 оборот яһай торған 100 мең киловатт ҡеүәтле, водородлы һыуытҡыслы трубогенератор төҙөүҙәре өсөн.

25. **Заглодин** Леонид Спиридоновичка—эштәр етәксеһенә, **Жунько** Владимир Ивановичка, **Подклетнев** Михаил Ивановичка — Ленгипрогаз инженерҙарына, — сланецтарҙы камерный мейестәрҙә юғары калориялы газға әйләндереү юлдарын уйлап сығарыуҙары һәм уны тормошҡа ашырыуҙары өсөн.

26. **Иванов** Александр Михайловичка — Уралдағы Киров заводының технологына, — ауыр тракторҙарҙың гусеницаларын етештереүҙең яңы методтарын уйлап сығарыуҙары һәм уны практикала ҡулланғандары өсөн. был методтар хеҙмәт етештереүсәнлегенең юғары үҫешен һәм продукцияның сифатын яҡшыртыуҙы, үҙенә төшөү хаҡын кәметеүҙе тәьмин итә.

27. **Ивченко** Александра Георгиевнаға — эштәр етәксеһенә, **Лотарев** Владимир Алексеевичка, **Анашкин** Александр Михайловичка — 478-се номерле заводтың инженерҙарына, — яңы авиацион моторҙар төҙөүҙәре өсөн.

28. **Исаев** Алексей Михайловичка, мотор төҙөлөшө буйынса баш конструкторға, — самолеттар өсөн яңы двигатель конструкцияһын эшләп сығарғаны өсөн.

29. **Кавалин** Григорий Ивановичка — текстиль машиналары һәм еңел машиналар төҙөлөшө ғилми-тикшеренеү институтының өлкән ғилми сотрудникенә, — оригиналь конструкциялы юғары тиҙлекле автоматик туҡыу станогын эшләп сығарғаны өсөн.

30. **Карапетян** Гурген Бейбутовичка — эштәр етәксеһе, нефть бораулау оборудованиеһе конструкторлыҡ бюроһы начальнигенә, **Власов** Александр Ивановичка, **Иванов** Григорий Андреевичка, **Земков** Михаил Андриановичка, **Корнилов** Михаил Михайловичка —Орджоникидзе исемендәге Урал ауыр машиналар заводының работниктарына, — нефть бораулауҙың ауыр установкалары конструкцияһын камилләштереү һәм уларҙы күпләп сығарыуҙы ойошторған өсөн.

31. **Квятковский** Владимир Станиславовичка — эштәр етәксеһенә, **Шапов** Николай Михайловичка — Бөтә Союз гидромашиналар ғилми-тикшеренеү институтының профессорҙарына, **Квитко** Михаил Николаевичка, **Комиссаров** Николай Алексеевичка, **Орахелашвили** Мираб Мамиевичка, Строев Георгий Федоровичка, Гидромашиналар Үҙәк конструкторлыҡ бюроһының инженерҙарына, — бәләкәй гидротурбиналарҙы камилләштергән һәм унификациялаған, уларҙы производствоға индергән өсөн.

32. **Клочко** Михаил Антоновичка — эштәр етәксеһе, СССР Фәндәр академияһының Курнаков исемендәге дөйөм һәм органик булмаған химия институтының профессорына, **Береснев** Иван Симоновичка, **Киреенко** Федор Трифоновичка — Норильск никель комбинатының инженерҙарына, — никель производствоһы отходтарын эшкәртеүҙең яңы методтарын эшләп сығарған һәм уларҙы производствоға индергән өсөн.

33. **Кожевников** Константин Ерофеевичка — Урал геология управлениеһенең өлкән инженерына, **Горшков** Григорий Васильевичка— Ивдель марганец партияһы геологына, **Глинских** Павел Яковлевичка, шул уҡ партияның өлкән бораулау мастерына,—төньяҡ Уралда марганец рудаһының ҙур ятыштрудниктарына,—авиацион двигателдәрҙе һынау өсөн яңы аппаратура төҙөгәндәре өсөн.

34. **Коломийцев** Аркадий Аркадьевичка, **Чухачев** Сергей Ивановичка — авиацион моторҙар төҙөлөшө Үҙәк институтының сотрудниктарына, авиацион двигателдәрҙе һынау өсөн яңы аппаратура төҙөгәндәре өсөн.

35. **Кондратьев** Георгий Михайловичка—Ленинградтың аныҡ механика һәм оптика институтының профессорына, — материалдарҙың йылылыҡ сифаттарын тиҙ билдәләү приборҙарын эшләп сығарғаны өсөн.

36. **Кононов** Виктор Ефимовичка — Мәскәүҙең протезлау ғилми-тикшеренеү институтының мастер-конструкторына, — ҡул протезының яңы актив конструкцияһын эшләп сығарған өсөн.

37. **Копылов** Николай Филипповичка — эштәр етәксеһе, медицина хеҙмәте полковнигенә, **Гинсбург** Николай Николаевичка — медицина хеҙмәте полковнигенә, — **Файбич** Михаил Михайловичка — медицина хеҙмәте полковнигенә, **Груденков** Андрей Степановичка — медицина хеҙмәте подполковнигенә, **Алтухов** Михаил Васильевичка — инженер-подполковникка, **Птушкин** Иван Васильевичка — медицина хеҙмәте полковнигенә, **Романов** Павел Феофановичка — медицина хеҙмәте подполковнигенә, — вакцина бактериофаг һәм антибиотиктар алыуҙың яңы методтарын эшләп сығарған һәм промышленносҡа индергәндәре өсөн.

38. **Кравцова** Зоя Ивановнаға— Урал геология управлениеһенең өлкән инженерына, **Пылаев** Борис Филипповичка — «Механобр» институтының лаборатория начальнигенә, — Уралда юғары сифатлы графиттарҙың ҙур ятыштарын асҡаны, разведкалағаны һәм промышленноста үҙләштергәне өсөн.

39. **Кубецкий** Леонид Александровичка — СССР Фәндәр академияһының автоматика һәм телемеханика институтының ғилми сотрудникенә, — күп каскадлы ҡабатлы-электрон трубкаларын уйлап сығарған өсөн.

40. **Кулиев** Али Муса улы — эштәр етәксеһе, Азербайжандың В. В. Куйбышев исемендәге нефть ғилми-тикшеренеү институты лабораторияһы начальнигенә, **Гейман** Ольга Абрамовнаға—шул уҡ институттың өлкән ғилми сотрудникенә, **Алиев** Фридун Абдул-Гусейн улына — 142-се номерле заводтың директорына, **Шкиян** Софья Христофоровнаға—Көнсығыш һәм көнбайыш райондары нефть промышленносе Министерствоһының техник управлениеһенең өлкән инженерына, — нефть майҙарының сифатын күтәреү методын эшләп сығарыуҙары өсөн.

41. **Леркер** Рувим Зиновьевичка — ҡара металлургия Министерствоһының Главкокс инженерына— кокс мейестәрендә ҡыҙҙырыуҙың гидравлический режимен эшләгән һәм тормошҡа ашырған өсөн. Был, мейестәрҙең капиталь ремонтһыҙ хеҙмәт итеү сроктарын арттырыуҙы тәьмин итә.

42. **Лившиц** Александр Марковичка, Ярославль автомобиль заводының баш инженерына, **Гусев** Иван Павловичка, **Иванов** Трифон Николаевичка, **Осинцов** Виктор Васильевичка, **Скотников** Виктор Васильевичка, **Ханин** Наум Самойловичка—шул уҡ заводтың инженерҙарына, — тиҙ йөрөшлө автомобиль дизелдәренең конструкцияһын камилләштергән һәм эшләп сығарыуҙы үҙләштергән өсөн.

43. **Люлька** Архип Михайловичка.—мотор төҙөлөшө буйынса баш конструкторға, — экспериментальный реактив авиацион двигатель төҙөгән өсөн.

44. **Ляндрес** Давид Моисеевичка — Харьков турбогенератор заводының баш конструкторына, — **Корниенко** Афанасий Михайловичка, **Паншин** Борис Михайловичка, **Розин** Давид Соломоновичка, — шул уҡ заводтың инженерҙарына, **Бабаков** Николай Григорьевичка, Уралтурбинзаводының баш инженерына, **Сатановский** Александр Елизаровичка, — ауыр машиналар төҙөү Министерствоһы техник управлениеһенең баш инженерына, **Филиппов** Дмитрий Александровичка, — 1-се ранг инженер-капитанға, **Пушкин** Иван Семеновичка — инженер-полковникка, — боевой карапталар двигателдәре конструкцияһын һәм производство технологияһын камилләштергәндәре өсөн.

45. **Магомет** Иосиф Яковлевичка — Киев өлкәһе Сквир тәжрибә баҫыуының селекция бүлеге мөдиренә, — йәшелсә һәм еләк культураларының ҡиммәтле яңы сорттарын үҫтергән өсөн, улар Украинала киң күләмдә ҡулланылалар.

46. **Манькин** Мендель-Эмануил Абрамовичка — эштәр етәксеһенә, **Корсун** Николай Николаевичка — 621-се номерле заводтың инженерҙарына, **Петров** Георгий Николаевичка — Мәскәүҙең В. М. Молотов исемендәге энергетик институтының профессорына, — ҡеүәтле выпрямительный трансформаторҙарҙың конструкцияһын эшләгән өсөн.

(Дауамы бар).

Коммунизм идеяларының бөйөк пропагандисе

(М. И. Калининдең үлеүенә ике йыл тулыуға ҡарата)

Бынан ике йыл элек, 1946 йылдың 3 июнендә коммунистар партияһының һәм Совет государствоһының төҙөүселәрҙән һәм уларҙың иң күренекле етәкселәренән береһе, бөйөк революционер, Ленин һәм Сталиндең тоғро соратнигы — Михаил Иванович Калининдең йөрәге тибеүҙән туҡтаны.

М. И. Калинин үҙ ғүмеренең илле йылын хеҙмәтсәндәр бәхете өсөн көрәшкә бирҙе. 18 йәшлек егет сағында уҡ ул тыуған ауылынан китте һәм пролетарий тормошо менән йәшәй башланы. Күп тә үтмәй Петербург эшселәре Путилов заводының лекальщиге Калининде уҙҙарының иң актив көрәштәрҙәренең береһе итеп таный башланылар. Ул ваҡыттарҙа, Ленин әйткәнсә, уналарған һәм йөҙәрләгән алдынғы эшселәр революцион эшкә тотондолар «һәм уҙҙарендә революцион көрәшкә сикһеҙ бирелгәнлекте тәрбиәләнеләр, массалар менән нык бәйләнгән был сыныҡҡанлыҡтан башҡа Россия пролетариатының уңышлы революцияһы була алмаҫ ине» (Ленин, әҫәрҙәр йыйынтығы XXIV том, 80-се бит).

Михаил Иванович Калинин дә пролетар революционерҙарҙың оло быуын кешеләренең береһе ине. Уның исеме беҙҙең партиябыҙҙың тарихы менән өҙлекһеҙ рәүештә бәйләнгән. Ул Ленин менән бергә марксистарҙың беренсе подпольный түңәрәктәрендә һәм «Эшселәр синыфын азат итеү өсөн көрәш союзында» эшләне. Ул Ленин һәм Сталин менән бергә большевистик партияны төҙөнө, большевистик «Правда»ны барлыҡҡа килтерҙе, бөйөк совет революцияһын әҙерләүҙә һәм уны үткәреүҙә актив ҡатнашлыҡ итте. Ул үҙе тураһында, шулай уҡ бөтә ғүмерем Ленин, Сталин етәкселегендә йәшәүҙән һәм көрәшеүҙән торҙо, тип бик хаҡлы рәүештә әйтте.

Уның ғүмере ҡурҡыныстар менән тулы булған профессиональ революционер ғүмере булды: 1899 йылдан алып 1916 йылға тиклем М. И. Калинин 14 тапҡыр арестҡа алынды! Оҙаҡ ваҡыттарға һөргөнгә ебәреү барышында, ҡаты һыуыҡтарға ул үҙендә түҙәл черталар тәрбиәләне; был черталар Тверь крестьяндары араһынан сыҡҡан Путилов заводы эшсеһенә Октябрь революцияһы еңгәндән һуң бер ҙә үтмәй, донъяла беренсе социалистик государствоның иң юғары органы етәксеһе булырға һәм унда 27 йыл буйына алмаштырғыһыҙ эшләргә мөмкинлек бирҙе.

М. И. Калинин беҙҙең партиябыҙҙың етәксе ядроһында ине. Бөйөк Ленин эшен дауам итеүсе иптәш Сталин етәкселек иткән был ядро аҙ ышаныусыларға һәм капитулянттарға ҡаршы, троцкийселәргә һәм зиновьевселәргә, бухаринсыларға һәм каменевселәргә ҡаршы көрәштә тулыһы менән төҙәлде, бөйөк Ленин байрағын һаҡлап алып ҡалды, партияны Ленин васыяттары тирәһенә туплады, совет халҡын илде индустриализациялау һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу юлына алып сыҡты.

* * *

Партияның һәм хөкүмәттең иң күренекле етәкселәренән береһе булған М. И. Калинин шул уҡ ваҡытта беҙҙең халҡыбыҙҙа иң белем бирәүсе бөйөк кеше ине. Фәнни коммунизм идеяларын пропагандалаусылар һәм агитаторҙар араһында ул бик хаҡлы рәүештә алдынғы урындарҙың береһен алып килде. Марксизм-ленинизмде белемдәрен нык төшөнгән, тәрән белемле марксист, ул бер уҡ ваҡытта хеҙмәт кешеләренә тәьҫир итеүҙең бөйөк талантына эйә ине. 1919 йылда Советтарҙың Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитете председателе итеп уның кандидатураһын тәҡдим иткәндә, Ленин, Калинин йөҙендә эшселәр һәм крәҫтиәндәр союзы кәүҙәләнә, тине. Ул крәҫтиәндәр араһынан сыҡҡан, улар менән бәйләнешен өҙмәүһеҙ әлмәртып тора һәм ауылды яҡшы белә. Икенсе яҡтан ул эшселәр тормошон бик яҡшы белә. «Петроград эшселәре, — тине Ленин Калинин тураһында, — уның хеҙмәтсәндәр массаларының киң ҡатламдарына яҡын кила белеүсенә төшенә алдылар».. Пропагандистар һәм агитаторҙар уларға оҫта яҡын кила алмаған ваҡыттарҙа иптәш Калинин был бурысты хәл итә алды» (Ленин әҫәрҙәре, XXIV том, 189-сы бит).

М. И. Калинин халыҡ менән тығыҙ бәйләнештә ине. Ул эшселәр, крәҫтиәндәр алдында, беҙҙең армиябыҙ һәм флотыбыҙҙың яугирҙәре алдында, студенттар һәм ғалимдар алдында, уҡытыусылар һәм матбуғат работниктәре алдында, партия активе йыйылыштарында һәм мәктәп балалары алдында сығыш яһай ине.

Ул үҙенең бөтә ғүмере буйынса Ленин менән Сталиндең бөйөк идеяларын массаға еткерә барҙы, хеҙмәтсәндәрҙе белемгә эйә булырға һәм үҙ белемдәрен хеҙмәтсәндәрҙең көндәлек көрәштәре менән бәйләп алып барырға ялҡынлы рәүештә саҡырҙы. Бының өсөн, тине ул, бөтәһенән элек марксизм-ленинизм теорияһын, донъяға коммунистик ҡарашты өйрәнергә кәрәк, ул һәр бер мәсьәләгә дөрөҫ яҡын килергә мөмкинлек бирә. «Әйтәйек, астроном өсөн бик ҙур телескоп, ә лабораторияла тикшереүсе өсөн — микроскоп нисек кәрәк булһа, пролетар революцияһы көрәшселәре өсөн донъяға коммунистик ҡараш шул тиклем уҡ кәрәк».

М. И. Калининдең сығыштарынан һәр бер совет кешеһе беҙҙең тирә-яҡтағы күренештәр тураһында фекер йөрөтөп марксизм-ленинизмде нисек итеп ижади рәүештә өйрәнергә, марксистик-ленинсе методты файҙаланып үҙ эшендәге практик бурыстарҙы, конкрет обстановкаға ярашлы рәүештә нисек хәл итергә кәрәклеге тураһында ҡиммәтле кәңәштәр һәм күрһәтмәләр таба ала.

«...Шундай кешеләр була, — тине М. И. Калинин отличник уҡытыусылар кәңәшмәһендә, — улар, картуф тултырылған тоҡ кеүек, ғилми текстар менән тулған булалар, ә был белемдәрен практик рәүештә ҡуллана алмайҙар». Бурыс — һәр бер китапты марксистәрсә, Ленинсә, Сталинсә уҡыуҙа. «Беҙ марксизмде-ленинизмде метод итеп, ҡорал итеп өйрәнәбеҙ, уның ярҙамында беҙ үҙебеҙҙең политик, общественный һәм шәхси поведениебеҙҙе дөрөҫ билдәләйбеҙ. Беҙ, был — кешенең практик тормошонда иң ҡеүәтле ҡоралы тип иҫәпләйбеҙ».

Михаил Иванович догматизмдең дошманы булды. Оппортунизм һәр ваҡыт марксизм-ленинизмде инҡар итеүҙән генә тормай, ә ул ҡайһы берҙә һәр бер хәреф алдында баш эйеүҙә, теорияға догматик яҡын килеүҙә лә кәүҙәләнә, тигән Ленин менән Сталиндең күрһәтмәләрен хәтергә төшөрөп, М. И. Калинин революцион теорияны өйрәнеүгә ижади рәүештә яҡын килеү, уның асылына төшөнөү кәрәклеген айырыуса һыҙыҡ өҫтөнә алды. «Мөһим мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә, уларҙы хәл итеүгә яҡын килеүҙә,— тине М. И. Калинин,—кемдең ысын марксист-большевик булыуы, кемдең уҡымышланып, хәреф алдында баш эйеүсе булыуы беленә лә ҡала». Михаил Иванович үҙе марксизм-ленинизмға донъяны танып белеүҙең һәм уны хеҙмәт кешеләре интересында ҡайтанан ҡороуҙың ҡеүәтле ҡоралы итеп ижади рәүештә яҡын килеү өлгөһөн күрһәтә ине.

Халыҡ араһында коммунизм орлоҡтарын сәсеп М. И. Калинин үҙенең революцион эшенең беренсе көндәренән уҡ эшселәр массаһы араһында синфи аң уятты. Ул эшселәр араһында капиталистик королешто емереү һәм яңы, социалистик общество төҙөү өсөн кәрәкле пролетарь моралдең ҡиммәтле сифаттарын: үҙ синифының алдында намыҫлылыҡ, дисциплиналылыҡ, ойошҡанлылыҡ, идеялылыҡ, көрәштә фидакәрлелек сифаттарын тәрбиәләне.

Элек бары тик эшселәрҙең алдынғы ҡатламдарына ғына хас булған был бөйөк мораль сифаттарҙы тәрбиәләү пролетар революцияһы еңгәндән һуң бик киң ҡолас алды. Илде социалистик нигеҙҙә ҡайтанан ҡороу барышында кешеләрҙең аңдары ла үҙгәрҙе. Большевиктар партияһы хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү буйынса уңышлы рәүештә бик ҙур эштәр алып бара. Совет кешеләренең яңы рухани йөҙҙәрен барлыҡҡа килтереүҙә Ленин менән Сталиндең тоғро ученигы, бик яҡшы большевистик пропагандист — М. И. Калинин күренекле урын алып килде.

Михаил Иванович общественность интересен, коммунистик идеялар өсөн көрәште бөтә нәмәнән дә өҫтөн ҡуйыусы кешеләр тәрбиәләүҙе идея эшенең төп бурысы итеп иҫәпләне. «Ҙур, идеялы тормош менән йәшәү — үҙ замананыңдың иң алдынғы һәм иң прогрессив синыфының общественный интерестәре менән, ә хәҙерге ваҡытта совет халҡының, социалистик тыуған илдең интерестәре менән йәшәү тигән һүҙ. Әгәр ҙә һеҙ ошо интерестәр менән йәшәһәгеҙ, әгәр һеҙҙең бөтә фекерҙәрегеҙ үҙ халҡығыҙҙы тағы ла күберәк юғары күтәреүгә, үҙ тыуған илегеҙҙең экономик һәм хәрби ҡеүәтен юғары күтәреүгә йүнәлтелгән булһа, әгәр һеҙ үҙегеҙҙең бөтә көсөгеҙҙе коммунизмдең тулы еңеүе өсөн көрәшкә бирһәгеҙ һәм был бөйөк идея һеҙҙең аңығыҙҙа өҫтөн урын алһа, ул ваҡытта, һеҙҙең ҙур тормош менән йәшәйәсәгегеҙгә мин шикләнмәйем»,—тине М. И. Калинин йәштәргә мөрәжәғәт итеп. Общественный интерестәр менән тулы, идеялы тормош «—ул ер йөҙөндә иң яҡшы, иң ҡыҙыҡлы тормош. Дөрөҫән әйткәндә, иптәш Сталиндең бөтә ғүмере тап ошондай тормош өлгөһө булып тора ла инде», — тип күрһәтте ул.

Ошондай большевистик идеялылыҡ беҙҙең илебеҙҙең миллионлаған хеҙмәтсәндәр массаларының аңына һеңгән. Улар актив һәм аңлы рәүештә коммунизм төҙөйҙәр. Ләкин капитализм ҡалдыҡтары күп кешеләрҙең аңында һаҡланып ҡалған әле, һәм партия ҡаланың һәм ауылдың бөтә эшсәндәрен коммунизм рухында тәрбиәләп, ул ҡалдыҡтарға ҡаршы арымай-талмай көрәшә. Коммунистик принциптар, әгәр уларҙы ябай хилеп алып ҡараһаҡ, — тине М. И. Калинин, — ул социалистик тыуған илгә мөхәббәт, иптәшлек, гуманлылыҡ, намыҫлылыҡ, социалистик хеҙмәтте һөйөү.

М. И. Калинин массалар араһында хеҙмәткә социалистик мөнәсәбәтте активерак тәрбиәләү кәрәклеге тураһында йыш ҡына әйтә ине. Был, яңы общественный королошто еңеүе өсөн иң төп һәм мөһим эш булған хеҙмәттең юғары етештереүсәнлеге өсөн көрәшеү, производстволы тәртипһеҙлыҡтарға, эрәм тамаҡтарға, ялҡауҙарға ҡарата килешмәүсән мөнәсәбәттә булыу, тигән һүҙ. Хеҙмәттең бөйөклөгөн асыҡ аңлауҙы кешеләргә ныҡлап төшөндөрөргә кәрәк, тип айырыуса әйтте М. И. Калинин. Беҙҙә һәр бер хеҙмәт ихтирам ителә, һәм беҙҙә юғары сортлы һәм түбән сортлы хеҙмәт юҡ. Хеҙмәтте һөйөү коммунистик моралдең төп элементтәренән береһе булыуын һәр бер кешенең аңлауы кәрәк. Әгәр социалистик обществола кеше яҡшы эшләй икән, ул шуның менән «коммунизмға барыу юлын таҙартыу менән генә ҡалмай, бәлки донъя пролетариатының ҡоллоҡ бығауын селпәрәмә килтерә. Ул коммунизм өсөн актив көрәшеүсе булып тора».

Совет обществоһында шәхси һәм общественный интересте бергә тура килтереү тураһында, социалистик милкте нығытыу һәм һаҡлау тураһында Михаил Ивановичтең әйткән һүҙҙәре, әйтерһең бөгөн әйтелгән кеүек, мөһим һәм актуаль булып яңғырайҙар. «Унда, сит илдәрҙә, айырым кешеләрҙең байлыҡ туплауы хакимлек итә. Уларҙа шәхси бәхет — бөтә нәмәнән өҫтөн ҡуйыла. Ә совет демократияһы коллективизм һәм иптәштәрсә хеҙмәттәшлек принциптәрен үҙенең нигеҙе итеп ала. Беҙ былай тибеҙ: социалистик государствоның яҡшы тороушо — бөтә нәмәнән дә элек кәрәк, үҙенлең шәхси көн-күрешендә яҡшыртырға теләйһең икән — социалистик обществоның көн-күрешен юғары күтәр. Социалистик государствоны өҙлекһеҙ нығытыу, уның материаль һәм культура байлыҡтарын үҫтереү, уның бөтә органдарының эшен яҡшыртыу айырым совет кешеһенең көн-күрешен артабан яҡшыртыуға, уның интеллектуаль һәм мораль сифаттарын үҫтереүгә алып бара».

М. И. Калининдең телмәрҙәре һәм мәҡәләләре совет милли ғорурлығы хистәре менән тәрән рәүештә һуғарылған. Ул — беҙ бәхетле халыҡ, сөнки тарих беҙгә Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә бығаса донъяла күрелмәгән эштәр башҡарыу бәхетен бирҙе, социализмде беренсе булып төҙөү, иҙеүселәр һәм иҙелеүселәр булмаған, бөтә халыҡтар ҙа тиң һәм бер-береһен ихтирам итә торған общество төҙөү бәхетен бирҙе, — тип йыш ҡына әйтә ине. Беҙҙең «обществобыҙҙы үҫтереүҙең ошондай ҡеүәтле хәрәкәт иттереүсе көсөнөң сығанағы — совет патриотизмендә икәнлеге беҙҙең өсөн асыҡ, тип күрһәтте ул. Совет патриотизме ул — үҙ халҡыңа, үҙ Тыуған илеңә, унда урынлашҡан социалистик тәртиптәргә, үҙ культураңа һәм көн-күрешеңә мөхәббәт.

М. И. Калинин тыуған илгә мөхәббәт тураһында һөйләгәндә платоник мөхәббәтте күҙҙә тотмайым, ә ныҡышмалы, актив, тотоп тыйғыһыҙ, дәртле мөхәббәтте, дошманға ҡарата аяу белмәгән, уларҙың бөтә төр сығыштарына һиҙгер, һәм тыуған ил хөрмәтенә һис бер төрлө ҡорбандар алдында ла туҡтап ҡалмай торған мөхәббәтте күҙ уңында тотам, тип айырыуса асыҡ әйтте. Ул, тыуған илебеҙ тағы ла көслөрәк һәм тағы ла ҡеүәтлерәк булһын өсөн һәм һис бер төрлө осраҡлылыҡ уны иҫкәртмәҫтән эләктереп алмаһын өсөн көсәркәнешле хеҙмәткә һәм ҙур көс һалыуға әтәреүсе мөхәббәт тураһында һүҙ бара, тип айырыуса асыҡ әйтте.

Беҙҙең кешеләрҙең рухани йөҙҙәре тураһында һөйләгәндә М. И. Калинин, — коммунистик моралдең асылы — халыҡ бәхете өсөн эшләүҙә, тип күрһәтте.

«Совет хөкүмәте, Ленин—Сталин партияһы бер маҡсатты тоталар, ул — халыҡ бәхете — һәм улар үҙҙәренең бөтә эштәрен ысын мәғәнәһе менән юғары моралле маҡсатҡа йүнәлтәләр.

Иптәш Сталин, халыҡ эше өсөн аҡтыҡҡы тамсы ҡаныма тиклем бирәсәкмен, тигән һүҙҙәрен үҙенең бөтә эштәре менән раҫлай. Был, кешелек моралененң иң юғары дәрәжәһе түгелме ни? Беҙҙең партиябыҙҙың, Ленин — Сталин партияһының морале беҙҙең халҡыбыҙҙың морале ул».

Беҙ, тине М. И. Калинин, йәштәргә һәм эшләргә үҙебеҙҙең учителдәребеҙҙән һәм юлбашсыларыбыҙҙан — Ленин менән Сталиндән өйрәнергә тейешбеҙ. Нисек итеп Ленинсә һәм Сталинсә йәшәргә һәм эшләргә өйрәнеү, халыҡ бәхете өсөн нисек итеп ленинсә-сталинсә хеҙмәт итергә кәрәклеге миҫалын Михаил Иванович Калинин үҙе күрһәтә ине. Шуның менән ул бөтә хеҙмәтсәндәрҙең ысын күңелдән яратыуына һәм ҡайнар һөйөүенә өлгәште.

Коммунизм өсөн ялҡынлы көрәшсе Михаил Иванович Калининдең мәңгелек образын совет халҡы мәңге хәтеренән сығармаҫ.

Партия тормошо

Тырыш хеҙмәт менән яулап алынған уңыштар

Туймазы районының игенселәре, яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреп, иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәүҙә беренсе еңеүгә өлгәштеләр: Бөтәһе 22.580 гектар ашлыҡ сәселде. Ҡиммәтле культура — бойҙай сәсеү майҙаны, үткән йылға ҡарағанда, 4.500 гектарға арттырылды.

Райондың колхозсылары, быйыл быға тиклем күрелмәгән дәрт һәм ойошҡанлыҡ менән эшләнеләр. Еңеү үҙенән-үҙе килмәне. Был еңеү — район партия ойошмаһының хужалыҡҡа етәкселек итеү методын партияның район һәм өлкә конференцияларының күрһәтмәләре нигеҙендә үҙгәртеп ҡороуының, колхозсылар һәм трактористар араһында алып барылған политик-массовый эштең һөҙөмтәһе ул.

Райком, етәкселек эшенә һыналған, инициативалы работниктарҙе — партиялы һәм партияһыҙ большевиктарҙе урлөтеү юлы менән, ауыл хужалығы бүлеген, МТС-тарҙы, колхоз һәм совхоздарҙы ойоштороу яғынан нығытты, Хужалыҡ ойошмаларының тапшырылған эш өсөн яуаплылыҡтары үҫте. Улар хәҙер хужалыҡ мәсьәләләрен үҙ алдарына хәл итергә өйрәнделәр һәм инициатива менән эшләй башланылар.

Яҙғы баҫыу эштәре башланыу алдынан райком сәсеүҙең анаҡ сроҡтын һәм уны үтәү өсөн кәрәкле булған ойоштороу сараларын билдәләне, район Советы башҡарма комитетенә, ауыл хужалығы бүлегенә конкрет күрһәткестәр бирҙе. Бирелгән йүнәлештең үтәлешен бюро үҙенең ныҡлы контроле аҫтына алды.

Райком работниктәре һәм бюроның бөтә члендәре урындарҙа булып, тәүге партия ойошмаларының боевой һәләтлектәрен күтәреү, уларҙың эшмәкәрлеген яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә йүнәлдереү буйынса түҙемле эш алып барҙылар. Һөҙөмтәлә, ауыл коммунистәре юғары урожай өсөн көрәштең алғы сафында булдылар, колхозсыларҙы иптәш Сталинға яҙылған хатта алынған яуаплы йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшкә күтәрҙеләр. Тура-нан-тура баҫыу эшендә ике йөҙгә яҡын коммунист эшләне. Трактор бригадаларында 13 коммунист һәм 25 комсомолец массовый-политик эш алып барҙы. Тәүге партия ойошмалары булмаған колхоздарға ярҙамға район активенән 31 кеше ебәрелде.

Артта ҡалып килгән колхоздар райкомдың иғтибар үҙәгендә булды. Районда бындай 13 колхоз бар ине. Уларға партия-политик эште юлға һалыу буйынса эшлекле ярҙам күрһәтелде. Райком секретарҙәренән иптәш Баранов «Ҡарлығаҡ ҡыуаҡ», «Красный Октябрь» колхоздарында, иптәш Еникеев «Кооператив № 1», «Юкәле бүләк» колхоздарында һәм бюроның башҡа члендәре лә шулай уҡ артта ҡалыусы колхоздарҙа булып, партия эшен юлға һалыуға өлгәштеләр. Шул арҡала тәүге партия ойошмалары правление эшмәкәрлегенә контролде яҡшырттылар, етешһеҙлектәрҙе ваҡытында асып, уларҙы бөтөрөү сараларын күрҙеләр. Был колхоздар сәсеүҙе алдынғылар менән бергә тамамлай алдылар.

Трактор агрегаттарында, баҫыусылыҡ бригадаларында һәм звеноларҙа 650 коммунист агитатор булып эшләне. Улар шәхси эш өлгөһө менән дә, большевистик ялҡынлы һүҙ менән дә колхозсыларҙы фидакәр хеҙмәткә күтәрҙеләр. «Баллы тау» колхозының агитаторҙары Шарәфетдинов һәм Ҡашапов иптәштәр сәсеүсе булып эшләп, нормаларын 120—130 процентҡа еткереп үтәнеләр. Шыпат исемендәге колхозда коммунист-агитатор иптәш Әхмәтгәрәев етәкселек иткән бригада сәсеү планын 18 майға уҡ тамамланы. «Үрнәк» колхозы партия ойошмаһы секретаре иптәш Әхмәдиев политик-массовый эште йөгөнтөлө, маҡсатҡа йүнәлешле итеп ойоштороу арҡаһында сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта тамамлауҙы тәьмин итте.

Туймазы районы юғары урожай өсөн көрәштең тәүге осорон уңышлы тамамланы. Алда тағы ла ҙурыраҡ бурыстар тора, ВКП(б) райкомы яҙғы баҫыу эштәре осоронда тупланған тәжрибәне киң файҙаланыу, етәкселектең форма һәм методтарын артабан камиллаштереү юлы менән, быйыл, сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылында, мул урожай үҫтереп алыуҙы тәьмин итер.

Р. Хәбибуллина,

ВКП(б)-ның Туймазы райкомы секретаре.

Юғары урожай өсөн көрәштә партия ойошмаһы

«Безбожник» колхозы партия ойошмаһы яҙғы сәсеүҙә һәр бер коммунисте эштең яуаплы участкаһына беркетте. Коммунистәр бригадир, звеновод, һөрөүсе һәм сәсеүсе булып эшләнеләр.

Партия ойошмаһы колхозсылар араһында политик-массовый эште көсәйтеүгә бик нык иғтибар бирҙе. Бригадаларға, звеноларға һәм трактор агрегаттарына яҡшы әҙерлекле агитаторҙар беркетелде. Агитколлектив етәксеһе иптәш Борисов агитацион-массовый эште иптәш Сталинға яҙылған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәү маҡсатына ярашлы итеп ойошторҙо. Был маҡтаулы бурысты үтәүҙә агитаторҙарға бөтә яҡлап ярҙам күрһәтте. Агитаторҙарҙан Волкотруб, Самбор, Дейненко һәм башҡа иптәштәр хужалыҡ һәм политик темаларҙа йөкмәткеле беседалар үткәрҙеләр, ялҡынлы һүҙ менән колхозсыларҙы баҫыу эштәрен ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреүгә рухландырҙылар. Шул арҡала колхозсылар иң һыҙғанып эшләнеләр, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде. С. Волкотруб, Петр Иваха, Сергей Джур, Александр Иваха иптәштәр һөрөү һәм сәсеү эшендә көндәлек нормаларын 150—170 процентҡа еткереп үтәнеләр.

Партия ойошмаһының дөрөҫ етәкселек итеүе арҡаһында «Безбожник» колхозы яҙғы сәсеүҙе Ҡандра районында беренсе булып, 10 көн эсендә тамамланы.

Н. Идиәтшина.

Редакцияға хаттар

Педучилищеләрҙә башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса китаптар юҡ

Педучилищеләрҙә тел һәм әҙәбиәтте уҡытыу бик мөһим урын тота. Сөнки улар йәш быуынға коммунистик тәрбиәнең нигеҙҙәрен биреүсе башланғыс мәктәптәргә уҡытыусылар әҙерләйҙәр. Ә бала фән нигеҙҙәрен иң тәүҙә туған тел арҡыры ала.

Башҡортостанда педучилищеләр 25—30 йыл йәшәп килеүҙәренә ҡарамаҫтан, бөгөнгө көнгә тиклем улар туған әҙәбиәт буйынса дәреслек тә, хрестоматия ла күргәндәре юҡ әле.

Педучилищеләрҙең 4 йыллыҡҡа әйләндерелеүе айҡанлы тел фәне буйынса иптәш Ҡ. Әхмәр тарафынан яңы программа төҙөлгәйне. Программаны характерлау өсөн бер генә миҫал килтереү ҙә етә. I-се курста тел һәм әҙәбиәткә 108 сәғәт билдәләнгән, ә программа 144 сәғәткә иҫәпләнеп төҙөлгән. Мәғариф министерствоһы ошондай программаны раҫлаған!..

Дәреслектәр һәм башҡа ҡулланма материалдар булмау сәбәпле педучилищелә тел һәм әҙәбиәт уҡытыусыларға урта мәктәптәр өсөн төҙөлгән дәреслек һәм хрестоматияларҙан файҙаланыу менән генә сикләнергә тура килә.

Башҡорт теленең һәм әҙәбиәтен педучилищеләрҙә уҡытыуҙы тейешле кимәлгә күтәреү өсөн Башҡорт АССР-ы Мәғариф Министерствоһының, Башҡортостан тел—әҙәбиәт һәм тарих фәнни — тикшеренеү институтының был эшкә ҙурыраҡ иғтибар биреүҙәре кәрәк.

Т. Аслай,

Тәмәс педучилищеһе.

НИӘ ИШЕМБАЙҘА ҠАЛАНЫ ТӨҘӨКЛӘНДЕРЕҮГӘ ҺАЛҠЫН ҠАРАЙҘАР?

Ишембайҙа ҡаланы төҙөкләндереү тураһында күп һөйләйҙәр. Ҡайһы бер саралар үткәреү өсөн средстволар ҙа билдәләйҙәр. Ләкин күҙгә күренгән эш юҡ.

Стандарт йорттар поселкаһы электр яҡтылығы һәм һыу менән бик насар тәьмин ителә, һыу колонкаһы күп ваҡыт эшләмәй тора, яҡтылыҡ бер аҙна булһа, икенсе аҙнала булмай. Ҡаланың коммуналь конторлаһы етәкселәре был хәлде ишетеп түгел, күреп белһәләр ҙә, бер сара ла күрмәйҙәр.

Өс йыл инде, поселкала радио юҡ. Квартираларға газ үткәреү эше лә һаман да хәл ителмәй килә. Газ өсөн үткәрелгән линия эксплоатацияға тапшырылдыҡ булып сыҡманы.

Х. Нәжметдинов.

СӘСЕҮҘЕ ТИҘЕРӘК ТАМАМЛАРҒА, УРОЖАЙ ЙЫЙНАУҒА ӘҘЕРЛЕК ЭШТӘРЕН КИҢ ЙӘЙЕЛДЕРЕРГӘ!

Яҙғы сәсеүҙә районлар ярышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 1 июненә, процентарҙа)

Тотҡан урыны	Районлар исеме	Сәселгән	Һөрәлгән	Тотҡан урыны	Районлар исеме	Сәселгән	Һөрәлгән
1.	Туймазы	100,6	103	33.	Мәсетле	81,9	91
2.	Янаул	96,3	91	34.	Матрай	81,1	86
3.	Белорет	96,1	146	35.	Стәрлебаш	80,1	77
4.	Салауат	95,0	112	36.	Кушнаренко	80,0	71
5.	Балтас	93,0	92	37.	Благовар	79,9	81
6.	Покровка	92,6	97	38.	Иглин	79,5	81
7.	Ҡандра	92,4	87,7	39.	Маҡар	78,5	76
8.	Дәүләкән	91,5	90	40.	Пәрмәкәй	78,4	56
9.	Баҡалы	90,5	82	41.	Бөзәя	78,0	73
10.	Тәтешле	90,3	86	42.	Аургазы	77,8	71
11.	Бәлмаҡ	90,2	109	43.	Илеш	77,5	73
12.	Өфө	90,0	87	44.	Оло-Тиләк	77,5	73
13.	Асҡын	89,9	87,7	45.	Федоровка	77,3	71
14.	Дыуан	88,5	100	46.	Ҡырмыҫҡалы	77,0	77
15.	Краснокама	88,5	90	47.	Нуриман	76,4	71
16.	Стәрлетамаҡ	88,1	92	48.	Дүртөйлө	75,9	72
17.	Ҡыйғы	88,0	132	49.	Хәйбулла	75,7	82
18.	Әбйәлил	87,9	101	50.	Бәләбәй	75,3	68
19.	Белокатай	87,5	102	51.	Әбзан	75,1	73
20.	Борай	85,6	83	52.	Ғафури	74,6	69
21.	Мишкә	85,1	78	53.	Йомағужа	73,6	68
22.	Шишмә	85,0	82	54.	Бишбүләк	72,6	72
23.	Учалы	85,0	115	55.	Саҡмағош	72,6	68
24.	Ҡалтасы	84,7	81	56.	Көйөргәҙе	70,8	69
25.	Бөрө	84,5	81	57.	Күгәрсен	69,1	64
26.	Байҡыбаш	83,9	86	58.	Архангель	69,0	58
27.	Бүздәк	83,7	78	59.	Воскресен	69,0	67
28.	Шаран	83,1	73	60.	Мәләүез	69,0	66
29.	Ҡариҙел	83,0	82	61.	Ылайыр	64,8	59,8
30.	Благовещен	82,9	80	62.	Бөрйән	62,4	60
31.	Әлшәй	82,8	79	63.	Зианчура	60,3	54
32.	Миәкә	82,5	83				

Тағы ла яҡшыраҡ эшләргә

ӘСКӘР. (Телефон аша). Әбйәлил районының колхоздарында һуңғы бер көндә сәсеү темпы күтәрелде. 25 майға районда сәсеү планы 71,3 процентҡа үтәлгән булһа, 1 июнгә план үтәлеше 87,9 процентҡа етте.

Бөтәһе 9 мең 500 гектар майҙанда бойҙай сәселде. Был, үткән йылға сағыштырғанда 3 мең гектарға артыҡ, тигән һүҙ.

«Большевик» колхозының члендәре сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта, юғары сифатлы итеп үткәреп, колхоздар ара ярышта беренсе урынды алдылар. Был колхоз пландан тыш 60 гектар бойҙай сәсте. «Серп» колхозында ла 650 гектар урынына, 775 гектар бойҙай сәселде. Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле иптәш Селиванов етәкселек иткән баҫыусылыҡ бригадаһы үткән йыл 21 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан 20-шәр центнер урожай алғайны. Быйыл бригада тағы ла ҙурыраҡ йөкләмәләр алды. 142 гектар майҙанда бойҙайҙың һәр бер гектарынан кәмендә 150-шәр бот урожай алыу өсөн ныҡлы көрәш бара. Сәсеү тамамланыу менән звенолар утауға тотоналар. Бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан 30-ар центнер урожай алырға һүҙ биргән иптәш Еремсевтең комсомол-йәштәр звеноһы сәсеүҙе үҙ хеҙмәттәре менән тамамланы. Был звено 30 гектар уҡыш сәселгән ҡыҙ үҫемлектәрен тәрбиәләй.

Әбйәлил МТС-ы үҙе хеҙмәтләндергән колхоздар менән төҙөгән договорҙы намыҫ менән үтәй. МТС май айының икенсе ун көнлегендә сәсеү графигын артығы менән үтәп республиканың МТС-тары араһында ярышта беренсе урын алды. ВКП(б) Өлкә Комитетының һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алды. Был тракторсыларҙы тағы ла яҡшыраҡ эшләүгә дәртләндерҙе. МТС коллективы 30 майға йыл трактор эштәре планын 118 процентҡа үтәне. Коммунист иптәш Мелетов етәкселек иткән трактор бригадаһы айырыуса яҡшы эшләй. Бригада трактор эштәре планын 150 процентҡа үтәп, 1500 килограмм яғыулыҡ экономия яһаны. Хәҙер тракторсылар үҙҙәре хеҙмәтләндергән колхоздар ярҙамы менән пар һөрөү эштәрен башҡаралар.

Х. Банмов.

Комбайндарҙы ремонтлауҙы өлгөлө ойошторорға

Дәүләкән районының колхоздары быйыл 62 мең гектар майҙандың урожайын йыйнап алырға тейештәр. Был мөһим бурысты уңышлы үтәлеүен МТС-тарҙағы һәм совхоздарҙағы комбайндар паркын, ашлыҡ һуҡҡыс машиналарҙы, шулай уҡ колхоздарҙағы бөтә төр урожай йыйнау ҡоралдарын алдан әҙерләү хәл итәсәк.

Дәүләкән МТС-ы коллективы (директоры Социалистик Хеҙмәт Геройы Ф. М. Павлов) комбайндарҙы тракторҙар ремонтлау менән бергә бәйләп алып барҙы. Ремонт ғинуар айында башланды һәм бригадно-узловой метод менән ойошторолдо. Моторҙарҙы, хелерҙәрҙе, һуҡҡыс машиналары ремонтлауҙа Ленин орденле Букин, Князев һәм Блохин иптәштәр етәкселек итәләр. Ремонттың сифатына ныҡлы иғтибар ителә. Комбайндарҙы ремонтлау эшендә 46 комбайнер һәм уларҙың ярҙамсылары ҡатнаша. Улар араһында политик-массовый эш киң йәйелдерелде. 8 тапҡыр доклад, беседа үткәрелде. СССР Верховный Советы Президиумының ауыл хужалығы алдынғыларына 1948—1949 йылдарҙа Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм СССР ордендәре, медалдәре менән наградлау тураһындағы яңы Указы ремонтсылар араһында ҙур күтәренкелек тыуҙырҙы. Хәҙер 33 комбайн моторы ремонтланды, 17 комбайн бөгөндән баҫыуға сығырға әҙер. МТС коллективы 15 июнгә бөтә комбайндар паркын колхоздарға ебәреү йөкләмәһен алды.

Ләкин Суйынсы, Аслыкүл МТС-тарында комбайндарҙы ремонтлау насар бара. Суйынсы МТС-ында быйыл 12 комбайнға капиталь, 17 комбайнға ағымдағы ремонт үткәрергә планлаштырылған. Әле булһа бер комбайн «Энергия» колхозынан МТС усадьбаһына алып ҡайтылмаған. Ремонтсылар өсөн торлаҡ һәм столовой ойошторолмаған. Уларҙың күбеһе ауылдарға ҡайтып йөрөү менән күп ваҡыттарын бушҡа үткәрәләр. Социалистик ярыш ойошторолмаған.

МТС директоры иптәш Аношко:

— Ремонтты һуңға ҡалып башланыҡ. Комбайнерҙарҙы йыйнай алманыҡ, — ти.

График буйынса 1 июнгә 27 комбайн ремонттан сығырға тейеш булһа, ни бары 6 ғына комбайн, 15 мотор ремонтланған. Ремонтланған 16 номерлы мотор тикшерелгәндән һуң, яраҡһыҙ табылды. МТС-та 5 комбайнер етешмәй. Механизаторҙар араһында политик-массовый эш тейешле юғарылыҡҡа ҡуйылмаған.

Аслыкүл МТС-ы зонаһында 18 мең гектар майҙанда урожай комбайндар менән йыйналасаҡ. МТС-та бөтәһе 24 комбайн булып, уларҙың 20-һе генә ремонтҡа яраҡлы ҡалған 4 комбайндың рамаһы ғына ҡалған. Ошо көнгә тиклем 7 генә комбайн ремонтланған. МТС директоры иптәш Максимов запас частәр юҡ, тип тыныс йәшәй.

Ғ. Идрисов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Шефтар

Трактор будкаһы эргәһенә бер формала кейенгән, ҡыҙыл галстуклы пионерҙар төркөмө килеп туҡтаны.

— Һаумыһығыҙ, ағайҙар! — тинеләр улар хор менән.

— Ә, шефтар килгән икән, һаумыһығыҙ, һаумыһығыҙ! —тип, яҡын туғандарса иҫәнләштеләр.

Өлкән пионервожатый иптәш Вәлиева Урманбишкаҙаҡ балалар йортоноң пионер активы тарафынан бөгөн трактор бригадаһында художестволы сығыш ойошторолаҫағын белдерҙе.

Тракторсылар эштән бушанылар. Күңелле ял башланды. Пионерҙар матур итеп бейенеләр, йырланылар, таҡмаҡтар әйттеләр, тракторсылар тураһында шиғырҙар һөйләнеләр. Китаптарҙан ҡыҙыҡлы өҙөктәр уҡынылар.

Художестволы сығыш тамамланғанда, бер нисә пионерка будканың эсен ҡырып йыуып, стеналарын һөртөп, әйбәтләп йыйыштырып сыҡты. Тракторсылар бөтәһе өсөн дә шефтарға ысын күңелдән рәхмәт әйттеләр, тағы ла килеүҙәрен һоранылар.

Йәш патриоттар бында түҙемһеҙлек менән көтөп алыналар. Улар ике көнгә бер килаләр һәм, шул рәүешле, концерттар бирәләр, гәзиттәләр, китаптар ҙа уҡыйҙар, будканы ла йыйыштыралар. Кескәй шефтарҙың наказдарын күңелдәрендә тотоп, тракторсылар ҙа арыу-талыуҙы белмәй эшләйҙәр.

16 йәшлек тракторист Степанов Елисей бер сменала 12 гектар урынына 21 гектар майҙанға ашлыҡ сәсә. Иванов Кирилл һәм Шәрәфетдинов Миңнеәхмәт көндәлек норманы 117—118 процентҡа үтәйҙәр.

Хәҙер пионерҙар шефлыҡ иткән Булатов Дауыттың «Тратау» колхозын хеҙмәтләндереүсе бригадаһы Маҡар МТС-ының алдынғы бригадалары сафында тора.

Ф. Ҡотлобаев.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Машиналар урожай йыйнауға әҙер

Беҙҙең «Вольная жизнь» колхозы Ғафури районында иң беренсе булып яҙғы сәсеү планын 22 майға 100 процентҡа үтәне. Бөтәһе 176 гектар һабан ашлығы 18 эш көнөндә тулыһынса сәселеп бөттө, 1 июнгә пар һөрөү планы ла үтәлде.

Шулай уҡ беҙ урожай йыйнауға әҙерлек эштәрен дә тамамлау алдында торабыҙ. Бер двигатель, ике молотилка, урғыс машиналар, тырмалар күптән уҡ ремонтланып ҡуйылдылар. Яңынан ике ырҙын төҙәтелде. Ҡул тырмалары, салғы, ураҡ, һәнәктәр ҙа ошо көндәрҙә тулыһынса әҙер буласаҡ.

М. Ипатов,
Ғафури районы, «Вольная жизнь» колхозының председателе.

Темп түбән

Ҡыйғы МТС-ында 21 комбайндың 7-һе генә ремонттан сыҡты. Ғинуар айында уҡ башланған эштең ошондай һөҙөмтәһен МТС етәкселәренең ғәмһеҙлектәренән башҡа бер нәмә менән дә аңлатып булмай. МТС-тың өлкән механигы иптәш Иәркәйев:

— Ваҡыт күп, әле сәсеү ҙа бөтмәгән бит,—ти.

Шундай ҡараштың йәшәүе һөҙөмтәһендә ремонттың темпы түбән. 42 комбайнер һәм уларҙың ярҙамсыларынан тик 10 кеше ремонтта ҡатнаша. Ремонтсылар өсөн эш һәм тормош шарттары тыуҙырылмаған. Улар араһында массовый-политик эш алып барылмай. Был хәл МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Тихомировты һис борсомай. Һөҙөмтәлә хеҙмәт дисциплинаһы түбән, сифатҡа иғтибар ителмәй.

«Урожай» колхозында эшләйәсәк «Сталинец» комбайнының сыйырҙары иҫке, ҡайҙан етһә шунан йыйнап ҡуйылған. Комбайнер ярҙамсыһы иптәш Харисов.

— Был сыйырҙар менән эшләп булмаясаҡ, ул эшкә башлау менән өҙөлөп бөтәсәк,—ти. Ә комбайн комиссия тарафынан «яҡшы ремонтланды», тип ҡабул ителгән. МТС-та ремонтланып бөттө, тип иҫәпләнгән бөтә комбайндар өсөн дә бик күп частәр кәрәк әле. Ләкин уларҙы булдырыу, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн саралар күрелмәй.

Н. Ғәлимов.

ЧЕХОСЛОВАКИЯ. Прагала славян илдәре ауыл хужалығы күргәҙмәһендә Советтар Союзы, Чехословакия, Польша, Югославия һәм Болгария ҡатнашалар. Күргәҙмә һуғыш тарафынан килтерелгән емерелектәрҙе славян иле халыҡтарының ҡыҫҡа темптар менән алға ебәреүҙәрен һәм уларҙың үҙ-ара халыҡ хужалыҡтары алға ебәреүҙәрен күрһәтә.

Һүрәттә: Дреливица ауылының (Моравия) крәҫтиәнкәһе М. Грубешева Советтар Союзы павильонындағы экспонаттарҙы ҡарай.

Л. Доренский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет-Финляндия договорының ратификацион грамоталарын алышыу

ХЕЛЬСЕНКИ, 31 май. (ТАСС). 1948 йылдың 31 майында Хельсенкиҙә ССР Союзының Финляндия республикаһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Посланнигы Г. М. Савоненков һәм Финляндияның Сит ил эштәре Министре Карл Энкель Совет Социалистик республикалар Союзы менән Финляндия республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында төҙөлгән һәм 1948 йылдың 5 апрелендә Мәскәүҙә ҡул ҡуйылған һәм 1948 йылдың 30 апрелендә Финляндия республикаһының Президенте тарафынан, 1948 йылдың 11 майында ССР Союзы Верховный Советы Президиумы тарафынан ратификацияланған Договорҙың ратификацион грамоталары менән алыштылар.

Ратификацион грамоталар менән алышҡан саҡта Советтар Союзы яғынан ССР Союзы миссияһы советниктары А. Н. Федоров, М. Л. Мухин, И. Г. Сысоев, хәрби атташе генерал-майор С. Ф. Токарев, СССР-ҙың Финляндиялағы сауҙа вәкиле М. К. Артемьев, миссияның беренсе секретарҙары А. В. Зотов, М. Г. Котов, Н. Ф. Поселянин, икенсе секретарҙары И. П. Паккопен һәм С. С. Шустиков ҡатнаштылар.

Финляндия яғынан Финляндия Сейме Председателе К. Фагерхольм әфәнде, Финляндияның премьер-министре М. Пеккала әфәнде, Хөкүмәт Делегацияһының члендәре Социаль эштәр Министре О. Пелтонен әфәнде, Финляндия Сейменең Вице-председателе У. Кекконен әфәнде Сейм депутаттары И. Лейно, И. О. Седерьельм әфәнделәр, Делегация эксперттары генералдар А. Хейнрикс, В. Ойнонен әфәнделәр, юридик фәндәр докторы Т. Суонтауста әфәнде, Сит ил эштәре Министрлығының генеральный секретары Т. Вохонмаа әфәнде, Сит ил эштәре Министрлығының протоколдар бүлеге начальнигы Х. Вальваине әфәнде, Сит ил эштәре Министрлығының политик бүлеге начальнигы О. Вахервуори әфәнде һәм сит ил эштәре Министрлығының информация бүлеге начальнигы Л. Хьельт әфәнде ҡатнаштылар.

„Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн!" газетаһының нәүбәттәге номеры сыҡты

БЕЛГРАД, 31 май. (ТАСС). Белградта «Ныҡлы тыныслыҡ өсөн, халыҡ демократияһы өсөн!» газетаһының 11(14)-се номеры сыҡты. Газетала: «Коммунистик партиялар — хеҙмәтсәндәрҙең алдынғы отряды» тигән башмәҡәлә, донъяның илдәрендә демократик көстәрҙең көрәше һәм уңыштары тураһында белдереүҙәр: М. Горшичтең «Грецияла фашистик террор» тигән мәҡәләһе; Рене Аррашарҙың «Франция эшселәр синыфының үҙ талаптары өсөн көрәше» тигән мәҡәләһе, Джульяно Пайеттең «Италия хеҙмәтсәндәре реакцияға отпор бирәләр» тигән мәҡәләһе, Матиасе Ракошиҙең «Партия—авангард» тигән мәҡәләһе, Ш. Баштованскийҙең «Словакия хеҙмәтсәндәре халыҡ демократияһын ныҡыталар» тигән мәҡәләһе, А. Друговтың «Америка империализме — халыҡтар суверенитетенең дошманы» тигән мәҡәләһе, Уильям Галлахерҙең «Лейбористәр Англияның милли интерестарын һаталар» тигән мәҡәләһе, Джузеппи ди Витторионың «Профсоюздарҙың Бөтә донъя федерацияһы башҡарма комитетының эш йомғаҡтарына ҡарата» тигән мәҡәләһе, В. Вод-Пекстың «Халыҡ-демократик Чехословакия февралдән һуң», М. Марининдең «Доллар дипломатияһының үҙен-үҙе фаш итеүе» тигән мәҡәләһе һәм башҡа мәҡәләләр баҫылып сыҡты.

Бернадоттың Тель-Авивкә килеүе

ТЕЛЬ-АВИВ, 31 май. (ТАСС). «Израиль тауышы» радиоһы, Берләшкән милләттәр ойошмаһының Палестиналағы посреднигы граф Бернадот бөгөн үҙ штаты менән Тель-Авивка килде, тип хәбәр итә. Бернадот сит ил эштәре министры Шерток менән осрашты.

БЕВИНДЕҢ ОТСТАВКАҒА СЫҒЫУ ТУРАҺЫНДА ДАНИЯ ГАЗЕТАЛАРЫ

КОПЕНГАГЕН, 31 май, (ТАСС). Копенгаген газеталарының күпселеге бөгөн Лондондан алынған телеграммаларҙы урынлаштыралар. Был телеграммаларға ҡарағанда, Англияның политик ҡругтарында Бевиндең сит ил эштәре министры посынан китеүе көтөлә. Телеграммала Англияның тышҡы политикаһы, бигерәк тә Палестина мәсьәләһендә, Бевин етәкселегендә тупикка килеп терәлде, тип күрһәтелә. Бевиндең посына кем ҡуйыласағы тураһында төрлө хәбәрҙәр йөрөй. Шуның менән бергә күпселек газеталар Бивен кандидатураһына төбәп күрһәтәләр. Ләкин сит ил эштәре министры посын элекке министр Дальтондың алыуы ихтимал.

Америка радио күҙәтеүсеһенең белдереүе

НЬЮ-ЙОРК, 31 май. (ТАСС). Күҙәтеүсе Дрю Пирсон, нәүбәттәге радиопрограммала сығыш яһап, ғәрәптәр ҡулында булған танкылар һәм башҡа ҡоралдар Англия тарафынан Ленд-лиз буйынса АҠШ-тан алынғандар тип раҫланы.

Дания сауҙа делегацияһының Мәскәүгә килеүе

Данияның Сауҙа Министры иптәш О. Краг әфәнде етәкселегендә Дания Сауҙа делегацияһы 31 майҙа Мәскәүгә килде. Краг әфәнде менән бергә промышленность һәм эксперт вәкилдәре килде.

Аэропортта Делегацияны СССР Тышҡы Сауҙа Министрының урынбаҫары **А. Д. Крутиков**, СССР-ҙың Даниялағы сауҙа вәкиле **П. Н. Краснов**, СССР Тышҡы Сауҙа Министрлығының сауҙа договорҙар Управлениеһының Төньяҡ Илдәр Бүлеге начальнигы **К. И. Попов** һәм СССР Тышҡы Сауҙа Министрлығының Протокол Бүлеге начальнигы **Н. И. Кузьминский** ҡаршыланылар.

Килеүселәрҙе, шулай уҡ, Данияның СССР-ҙағы Ғәҙәттән тыш посланнигы һәм Тулы Хоҡуҡлы Министры **К. Монрад—Хансен** әфәнде һәм Данияның Мәскәүҙәге миссияһы члендәре ҡаршыланылар.

(ТАСС).

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

НЬЮ-ЙОРК, 31 май. (ТАСС). Хәбәрселәрҙең Палестинанан бирелгән хәбәрҙәренә ҡарағанда, еврей армияһы командованиеһенең хәбәрҙәре, еврей ғәскәрҙәренең штурмовой ике группаһы төньяҡ Палестинала ғәрәптәрҙе ҡыйратып һәм биш ауылды алдылар, тип белдергәндәр. Шулай уҡ еврейҙәрҙең ударный группалары Иерусалимдан ун мил көнбайышта ятҡан Рас Элейнде һәм Иерусалимде һыу менән тәьмин итеүсе һыу магистралын алдылар, тип иғлан ителгән. Ғәрәптәр контр атака башлағандар. Һуғыштар дауам итә.

Израиль государствоһы самолеттары Рамаллах һәм Наблус ҡалалары районында бергә тупланған ғәрәптәрҙе бомбаға тотҡандар.

Ассошиэйтед Пресс агентствоһының хәбәрҙәренә, ғәрәп легионының артиллерияһы Тель-Авив ҡалаһына ҡурҡыныс тыуҙырып, ярым дуга формаһында урынлашҡан патруль частары Хартиетәге көнбайышҡа табан, Тель-Авивтан 16 километрҙан да алыҫ булмаған ерҙә, хәрәкәт итәләр, тип хәбәр итә. Египет ғәскәрҙәре Ғәзәнең позицияларынан 20 километрҙар алыҫлыҡта булған Ишдудта торалар.

Ҡытайҙа яңы хөкүмәттең төҙөлөүе

НАНКИН, 1 июнь. (ТАСС). Ҡытай президенты Чан Кай-ши башҡарма юандең (министрҙар кабинетының) составын официаль рәүештә раҫланы. Хөкүмәт составына 24 кеше инде. Шуларҙан ике министр портфелен (сауҙа һәм промышленность, игенселек һәм урман сыныҡ министрҙары портфелдәрен) йәш ҡытай партияһы (гоминдандың ҡушылыусы ваҡ буржуаз партияһы) вәкилдәре алдылар. Пэш партияһының башҡа ике вәкиле хөкүмәт составына портфелһеҙ инделәр. Яңы хөкүмәттә ҡалған бөтә һәм посттарҙы гоминдан члендәре алдылар.

Башҡарма юандең председателе (премьер-министры) булып Вэнь-хао билдәләнде.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

РСФСР Министрҙәр Советы эргәһендәге юл управлениеһенең Өфө юл техникумы

1948—1949 уҡыу йылына беренсе һәм юғары курстарға

УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ

Техникум автомобиль юлдары өсөн трассалар билдәләү, проекттар төҙөү, юлдар һалыу һәм эксплоатациялау буйынса, шулай уҡ яһалма ҡоролмаларҙы (күперҙәр һәм торбалар), юл, торлаҡ һәм техник биналарҙы проектлау, төҙөү һәм эксплоатациялау буйынса техник специалистар әҙерләй. Уҡыу срогы 3 йыл 9 ай.

Ғаризалар техникум директоры исеменә почта аша заказной хат менән ебәрелә. Уға түбәндәге документтар беркетелә: белеме тураһында таныҡлыҡ (подлинникта), тыуыуы тураһында таныҡлыҡ (подлинникта), автобиография, өс фотокарточка, военнообязанныйҙарға хәрби хеҙмәткә булған мөнәсәбәте тураһында справка һәм сәләмәтлеге тураһында справка.

Ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә. Ҡабул итеү экзамендәре 1 августан 20 августҡа тиклем үткәрелә. Уҡыуҙар 1 сентябрҙән башлана.

Адрес: Өфө ҡалаһы, Омская урамы, 9-сы номерлы йорт, юл техникумы. «Баҙар майҙаны» остановкаһына тиклем 2-се һәм 3-сө номерлы трамвай менән барырға мөмкин.

Дирекция.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00769 Өфө газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 111

5 июнь шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАССР Министрҙәр Советенә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенә. (1-се бит).

Бөтә культураларҙы ошо бер-ике көндә сәсеп бөтөрөргә! (1-се бит).

Советтар Союзында. (1-се бит).

СССР Министрҙар Советенда. 1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производство эшенең методтарын тамырынан уҡ камиллаштереүҙәр өсөн Сталин премиялары биреү тураһында. (2-се бит).

Ишембай—Ермолаевка тимер юлы — яңы биш йыллыҡтың мөһим төҙөлешө. (2-се бит).

Н. Чижов. — В. Г. Белинский тәрбиә тураһында. (3-сө бит).

Биш йыллыҡты — дүрт йылда! Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәбеҙҙе үтәүҙә стахановса эшләйбеҙ. (3-сө бит).

И. Болдогоев. — Төрөкмән тау итәгендә. (3-сө бит).

Беҙҙең республикала. (4-се бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. В. Ғирфанов. — Бойҙай сәсеүлектәрен өлгәлә тәрбиә. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Совет техникаһының алдынғы деятелдәре

1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производство эшенең методтарын тамырынан уҡ камиллаштереүҙәр өсөн Сталин премиялары биреүҙе совет халҡы ҙур ҡәнәғәтләнеү тойғоһо менән ҡаршыланы.

Ғилми-техник прогресс юлы менән ҡыйыу рәүештә алға барыусы, социалистик Тыуған илде экономик яҡтан артабан үҫтереү өсөн актив рәүештә көрәшеүсе совет техникаһы деятелдәре, новаторҙар лауреаттарҙың яңы отрядында күренекле урын алалар.

Ҙур төркөм техника деятелдәренә, инженер-техник интеллигенцияның күренекле вәкилдәренә Сталин премияһы лауреаттары тигән юғары исемде биреү совет техника фекеренең яңы күтәрелешен күрһәтә. Шуны билдәләп үтергә кәрәк — быйыл күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производство эшенең методтарын тамырынан уҡ камиллаштереүҙәр өсөн Сталин премияһы лауреаттары исемен бик күп кеше ала, шуның менән бергә, уларҙың эштәренең техник кимәле уҙған йылғынан юғары.

Техниканың төрлө өлкәләрендә яңы конструкцияла машиналар төҙөүсе кешеләрҙең исемдәре Сталин премияһы лауреаттары исемлегендә почетлы урын алып тора.

Ленинградтың Сталин исемендәге металл заводының баш конструкторы профессор М. И. Гринберг етәкселек иткән конструкторҙар коллективына, 90 атмосфералы баҫым менән эшләй торған йөҙ мең киловатт ҡеүәтле пар турбинаһы етештереүҙең конструкцияһын һәм технологияһын эшләп сығарған өсөн, Сталин премияһы бирелде. [illegible]

Шулай уҡ иптәш Д. В. Ефремов етәкселек иткән конструкторҙар коллективы ла электрик генераторы уйлап сығарған өсөн Сталин премияһы алыу бәхетенә иреште. [illegible]

Ленинградтағы «Электросила» заводының консультанты иптәш Касьянов һәм башҡалар [illegible] Сталин премияһы лауреаты исемен алдылар.

Сталин премияһы лауреаттары һәм гидромашиналар буйынса [illegible] конструкторҙар бюроһы работниктәре [illegible]

Премияларҙың байтаҡ өлөше [illegible] геологтары [illegible]

[illegible] Урал геология управлениеһы (Дорофеев П. И. һәм башҡалар) [illegible]

Күп кенә ғилми работниктәрҙең теоретик хеҙмәттәрен айырыуса билдәләргә кәрәк. Был төрлө техник бурыстарҙы хәл итеүҙең яңы методтарын табырға һәм яңы приборҙар уйлап сығарырға мөмкинлек бирҙе.

Ленинградтағы аныҡ механика һәм оптика институтының профессоры Г. М. Кондратьев төрлө матдәләрҙең йылылыҡ сифаттарын билдәләүҙең яңы методын тапты.

Кондратьев байтаҡ приборҙар эшләп сығарҙы. Был приборҙар матдәләрҙең йылылыҡ сифаттарын бер нисә минут эсендә билдәләргә мөмкинлек бирә. Кондратьев методы өйрәнелә торған объекттар өлкәһен киңәйтә, мәҫәлән, туҡымаларҙың йылылыҡ сифаттарын табырға, йорт мейестәрендә, металлургик мейестәр регенераторҙарында һәм башҡаларҙа рациональ нигеҙҙә йылылыҡ алмашыныуының расчетын ҡуйырға мөмкинлек бирә. Кондратьев методтары СССР-ҙа күп ҡулланыла. Был методтар сит илдәрҙәге фәнде байтаҡ уҙып киттеләр.

Н. Е. Жуковский исемендәге Үҙәк Аэродинамика институтының профессоры В. В. Струминскийҙең фәнни яҡтан юғары кимәлдә торған аэродинамик тикшеренеүҙәрен билдәләп үтергә кәрәк. Беренсе дәрәжәләге Сталин премияһы алыуға лайыҡлы булған был эштең практик яҡтан да әһәмиәте ҙур.

Юғары етештереүсәнле эш методтары инициаторҙары — Уралдағы Киров исемендәге заводтың технологы А. М. Ивановҡа, Мәскәүҙәге «Ҡалибр» заводының өлкән мастеры Н. А. Российскийға, П. А. Чередниченко [illegible]

Беҙ Совет техникаһының Сталин премияһына лайыҡлы алдынғы деятелдәренән, производство новаторҙарынан, ҡайһы бер эштәренә генә туҡталдыҡ.

[illegible]

Большевиктар партияһы һәм совет хөкүмәте [illegible]

(«Правда» газетаһының 3 июнь баш мәҡәләһенән).

БАССР Министрҙәр Советенә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенә

БАССР Министрҙәр Советенә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенә [illegible] МТС-тарҙың сәсеү [illegible]

[illegible] Приют МТС-ы [illegible] БАССР Министрҙәр Советенең һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

Был МТС (директоры иптәш Ғәләмов, директорҙың политик бүлек буйынса урынбаҫары иптәш Алимов) яҙғы сәсеүҙә тракторҙар [illegible]

эше планын 105 процентҡа үтәне, шартлы бер тракторға 194-әр гектар ер эшкәртте.

Шулай уҡ яҙғы сәсеүҙә тракторҙар эше планын 127 процентҡа үтәгән, шартлы бер тракторға 176-шар гектар ер эшкәртеп Дәүләкән МТС-ы һәм тракторҙар эше планын 114 процентҡа үтәгән, шартлы бер тракторға 194-әр гектар ер эшкәрткән Туймазы МТС-ы ла [illegible] билдәләнде.

Бөтә культураларҙы ошо бер-ике көндә сәсеп бөтөрөргә!

Яңауыл районы сәсеүҙе республикала икенсе булып тамамланы

ЯҢАУЫЛ. (Телефон аша). Райондың игенселәре һәм механизаторҙары бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта сәсеүҙе иң ҡыҫҡа срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәрергә һәм колхоз баҫыуҙарында юғары урожай үҫтереп алырға һүҙ биргәйнеләр.

Район май айының һуңғы биш көнлөгөндә сәсеү темпын күтәреп, 1 июнгә республикала икенсе урынды алды. Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышында еңеүсе Яңауыл районына ВКП(б) Өлкә Комитетенең һәм БАССР Министрҙар Советенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде. Июнь айының тәүге ике көнөндә колхозсылар тағы ла ҙур күтәренкелек һәм дәрт менән эшләнеләр. Шуның һөҙөмтәһендә район 3 июнгә сәсеү планын тулыһынса үтәне. Бөтәһе 53 мең 545 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары, шуның эсенән 17 мең 800 гектар бойҙай сәселде. Район бойҙай сәсеү майҙанын һуғышҡа тиклемге кимәлдән арттырыуға өлгәште.

Алдынғы колхоздар — «Коммунар», «Искра», «1 май», «Красный путь» ауыл хужалығы артелдәре сәсеү планың арттырып үтәнеләр.

Хәҙер бөтә көс пар һөрөүгә тупланды. Колхоздар 4600 гектар майҙанда пар күтәрҙеләр. «Партизан», Андреев исемендәге колхоздар беренсе июнгә үк пар һөрөү планын үтәнеләр. Райондың колхозсылары һәм МТС работниктәре пар һөрөүҙе 10 июнгә тамамлау өсөн көрәшәләр.

Эш берҙәм бара

Тәтешле районының «Демен» колхозында баҫыу эштәре ҡыҙыу барҙы, һөҙөмтәлә колхоз сәсеүҙе алдынғылар рәтендә тамамланы. 558 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәселде. Быйыл, колхоз был менән сағыштырғанда, сәсеү майҙаны 159 гектарға артты.

Хәҙер инде игә сәселгән бойҙай, һоло культураларын яҡшы тулыһынса үҫәләр һәм юғары урожай вәғәҙә итәләр. Уҙған йыл бойҙайҙың һәр бер гектарынан 23-әр центнер урожай алған иптәш Рахима Туҡтаева звеноһының члендәре ла [illegible] ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр. Улар быйыл тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн бөтә саралар ҡоралар.

Х. Фазлыева.

Алдынғы колхоздар пландан тыш ашлыҡ сәсәләр

БӨРӨ. (Телефон аша). Районда сәсеүҙе тулыһынса тамамлаған колхоздар һаны артҡандан-арта бара. Хәҙер улар пландан тыш ашлыҡ сәсәләр.

«Путь Ленина», «25 лет Правды», «Ленинский Октябрь» исемендәге колхоздар сәсеү планын арттырып үтәнеләр. «Новый строитель», «Красное знамя», Шеврник һәм Сталин исемендәге колхоздар бойҙай сәсеү майҙанын иң алдан арттырҙылар. «Ужара» колхозы пландан тыш 150 гектар, Киров һәм Чапаев исемендәге колхоздар 100-әр гектар бойҙай сәстеләр.

М. Гуревич.

Сәсеүлектәрҙе ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр

Дәүләкән районының күпселек колхоздары быйыл яҙғы сәсеүҙе иң яҡшы агротехник сроктарҙа тамамлап, юғары урожай алыуға ныҡлы нигеҙ һалдылар. Бөтә сәсеүлектәр ҙә һәр бер урынла сыҡтылар һәм бик матур булып үҫәләр.

Колхозсылар яҙғы сәсеүҙе үҙ ваҡытында, юғары сифатлы итеп үткәреү менән бер рәттән, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе лә ҙур ойошҡанлыҡ менән эшләйҙәр. Хәҙер районның 20-нән артыҡ колхозында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше башланды. «Коммунар» колхозында 200 гектар, «Новая жизнь» — 170 гектар, «Бик-карамалы» — 400 гектар, «Ершак» — 350 гектар һәм «Октябрьск» колхозында 200 гектар бөртөклө ашлыҡ культуралары һәм кәбестәһе ҡыҫҡы утаныу тамамланды.

Р. Суфиянов.

Благовар МТС-ы үҙ йөкләмәһен үтәмәй

Благовар районы колхоздарына һәм машина-трактор станциялары республикабыҙҙың башҡа райондарына ҡарағанда баҫыу эштәрен күп иртә башланылар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, районда сәсеүҙе тулыһынса тамамлау өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Тик МТС-тарҙың эшен ҡыҙыуҡа яҡшыртырға, унда булған техниканы һәм бөтә резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға кәрәк.

Райондың колхоздарына һәм МТС-тарында килеп тыуған хәлде тәҙәтеү, эҙәкләтеп сығыу, сәсеүҙе ошо көндәр эсендә тулыһынса тамамлау өсөн бөтә мөмкинлектәр бар. Тик МТС-тарҙың эшен ҡыҙыуҡа яҡшыртырға, унда булған техниканы һәм бөтә резервтарҙы тулыһынса файҙаланырға кәрәк.

Ләкин был эшләнмәй. Благовар МТС-ы ағымдағы йылда 37 мең 950 гектар ер эшкәртеү йөкләмәһен алып, 26 колхоз менән договор төҙөшкәйне. Шуның 12 мең 805 гектарын трактор бригадалары сәсеү осоронда 25 көн срок эсендә эшкәртергә тейештәр. Договор срогы күптән үтте. Ләкин 19 трактор бригаданың бары 3 бригада ғына трактор эштәрен ваҡытында үтәне.

Жданов исемендәге колхозды хеҙмәтләндереүсе иптәш Терегулов етәкселегендәге трактор бригадаһы ағымдағы йылда колхоз менән 910 гектар ер эшкәртергә тейеш ине. Бригада баҫыу эштәре башланғандан бирле «ХТЗ» һәм «У-2» тракторҙары менән бары 450 гектар ер эшкәрткән. Был колхозда бөгөнгә көнгә тиклем 250 гектарҙан артыҡ бойҙай сәселмәгән. Трактор бригадаһы тәрлә сәбәптәр менән күп ваҡыт тик ултыралар.

МТС етәкселәре трактор бригадаларының эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар, уларҙың эшендә практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. МТС директоры иптәш Файрузов трактор бригадаларында бик һирәк була. Политик эштәр буйынса уның урынбаҫары иптәш Бакиев трактористар араһында политик-массовый эште насар ойоштора.

«Урал» колхозында эшләүсе тракторсылар сәсеүгә төшкәндән бирле бер генә газета алғандары юҡ. Улар партия һәм хөкүмәттең һуңғы ҡарарҙары менән таныш түгелдәр. «Боевой листоктар» сығарылмай. Политик-массовый эштең алып барылмауы һөҙөмтәһендә тракторсылар араһында хеҙмәт етештереүсәнлеге бик түбән.

Г. Идрисов. (Үҙ хәбәрсебеҙ).

Советтәр Союзында

МУРМАНСК. Баренц диңгеҙендә балыҡ тотоу. Балыҡ тотҡан саҡта тралдарға диңгеҙ акулалары, трескаларҙы ашаусы акулалар йыш ҡына эләгә. Күп промысел траулерҙәре бер рейдтә 10-лап акула тоталар. Акула бауырынан балыҡ майы иретелә, а тиреһе аяҡ кейемдәре һәм башҡа нәмәләр эшләүгә китә.

Һүрәттә: Капитаны иптәш Черков булған балыҡ тотоу траулеры. Балыҡ тотоу мастеры П. Махин (уңда) бригада тотҡан 800 килограмм ауырлыктағы акуланы эшкәртә.

Е. Халдей фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Йәштәрҙе ФЗО мәктәптәренә наубаттағы саҡырыу

15 июнда ҡала һәм ауыл йәштәрен ФЗО мәктәптәренә наубаттағы саҡырыуҙар башлана. Бөтәһе 243.700 кеше ҡабул ителәсәк.

Күмер, тау-руда һәм металлургия промышленносе ФЗО мәктәптәренә 18—19 йәштәге ир балалар ҡабул ителә. Был ФЗО-лар ер аҫты эштәре өсөн эшселәр, ҡорос иретеүселәр, горновойҙар, вальцовщиктәр һәм башҡа массовый профессия работниктәре әҙерләйҙәр. Төҙөүселәр ФЗО мәктәптәренә 17—18 йәштәгеләр ҡабул ителә.

Илебеҙҙең күмер сығарыла торған райондарында шахтерҙар әҙерләү өсөн 26 урында яңы ФЗО мәктәптәре асыла.

20 июлдә һөнәрселек һәм тимер юл училищеларына наубаттағе саҡырыу башланасаҡ. Уларға 14—18 йәштәге 281 мең ир һәм ҡыҙ балалар ҡабул ителәсәк.

(ТАСС).

Иген—государствоға

Советтәр Союзының көньяҡ райондарында колхозсылар беренсе мәҡәтдәс бурыстарын — государствоға иген тапшырыуҙы үтәүгә тотондолар.

Азербайжанда әҙерләүҙәр пунктына Астрахан-Базар районы Багиров исемендәге колхоздан иген тейәлгән ҡыҙыл ылау килде. Ул 500 бот самаһы яҡшы сифатлы арпа килтерҙе. Райондың башҡа колхоздары ла яңы урожай игенен тапшыралар.

Үзбәкстанда биш өлкәнең колхоздары арпа ура башланылар. Ҡашҡа-Дарья өлкәһе колхозсылары государствоға иген тапшырыуҙы республикала беренсе булып башланылар. Шулай уҡ Самарканд өлкәһенең ҡайһы бер район колхоздары ла яңы урожай игенен тапшыра башланылар.

Тажикстандың көньяҡ райондарында арпаның мул урожайын йыйнау массовый төҫ алды. «Большевик» ауыл хужалығы артелендә гектарынан 30—32-шәр центнер иген һуғалар. Яванск районы колхоздары «Заготзерно» пунктына игенде беренсе булып килтерҙеләр.

Инженер Васильев диафоны

Мәскәүҙең «Гостеасвет» заводы инженер К. В. Васильев конструкцияһында диафондар эшләй башланы. Диафон — бер үк ваҡытта тауыш сығарыу һәм тауыш яҙыу өсөн хеҙмәт итә торған аппарат. Ул ғәҙәттәге телефон йәшнигенә урынлаштырыла һәм теләһә ниндәй урында эшләй ала.

Беренсе аппараттар фәнни лекциялар үткәргәндә файҙаланыласаҡтар. Экранда бер үк ваҡытта диапозитивтәр, карталар, диаграммалар, һүрәттәр күрһәтеләсәк.

Диафон пленкаһына күренекле ғалимдәрҙең лекциялары яҙылды ла инде. Был лекцияларҙы илебеҙҙең иң алыҫ урындарында ла тыңларға мөмкин буласаҡ.

(ТАСС).

Көньякта бесән сабыу

Илебеҙҙең көньяғында бесәң сабыу эштәре киң йәйелдерелде. Советтәр Союзының 25 өлкә, край һәм республикаһында: Закавказьела, Урта Азияла, Ҡырымда, Төньяҡ Кавказда, Молдавияла, Казахстанда, Украинаның көньяғында һәм Волга буйында бесән йыйнау башланды. Колхоздар 250 мең гектар бесән йыйнанылар ҙа инде.

Май ямғырҙары бәләндәрҙә үләндәрҙең үҫешенә яҡшы тәьҫир итте. Колхоздарҙа мал өсөн күп күләмдә бик яҡшы аҙыҡ әҙерләргә мөмкинлек бар. Улар бесән йыйнай башлау алдынан бик күп һанда бесән сапҡыс машиналар һәм инвентарҙәр алдылар. Люберецкиҙәге ауыл хужалығы машиналары төҙөй торған Ухтомский исемендәге бер завод ҡына колхоздарға ат көсөндә эшләй торған 22 мең бесән сапҡыс бирҙе.

Яңы урожай емештәрен эшкәртеү башланды

БАКУ, (ТАСС). Азербайжандың консерва заводтарында варенье ҡайнатыу сезоны башланды. Ардубацк консерва заводы гөльемештән тәүге 17 мең банк варенье эшләп сығарҙы. Ағымдағы йылда Закоталь районының сәтләүек урманында мул урожай өлгөрҙө. Урындағы консерва заводы сәтләүектән беренсе продукцияларҙы етештерә лә инде.

Хочим районының һәм «Азконсервтрестың» Кубинск совхозының плантацияларында ер еләге йыйнау башланды.

ТАТАР АССР-ы. Ҡазан библиотекаһында һуҡырҙар өсөн 8 мең ярым китап иҫәпләнә. Улар араһында Марксизм-Ленинизм классиктәренең әҫәрҙәре, художестволы әҙәбиәт һәм дәреҫлектәр бар.

Һүрәттә: Библиотекала. Алдағы планда—библиотека мөдире Е. А. Соколовская. Китап ҡаштәһе эргәһендә — уҡыусы А. Д. Горных.

Б. Мясников фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Иген ташыуға әҙерлек

Көньяҡ-көнбайыш тимер юл округында яңы урожай игенен ташыуға әҙерлек киң йәйелдерелде. Вагондарҙы юғары сифатлы итеп ремонтлау өсөн вагонсылар араһында ярыш киңәйә. Күп кенә станцияларҙың тимер юлсылары, «Заготзерно» работниктәре менән берлектә, эш сәғәтенән тыш ваҡытта, склад биналарын һәм үлсәү хужалығын тәртипкә килтерҙеләр.

Иген тейәй торған ҙур станцияларҙа механиклаштерелгән 9 күсмә колонна ойошторолосаҡ. Уның составында 48 транспортер булыуға тейеш.

СССР Министрҙәр Советендә

1947 йылда күренекле уйлап сығарыуҙар һәм производствола эш методтарын тамырынан уҡ камиллаштергән өсөн Сталин премиялары биреү тураһында

(Аҙағы. Башы газетабыҙҙың 110-сы номерында).

47. Марти Юлий Юльевичкә — эштәр етәксеһенә, Мантейфель Борис Петровичкә, Михайлов Стефан Васильевичкә — ауыл хужалығы һәм океанографияһы Төньяҡ ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына, Корольков Геннадий Павловичкә — балыҡ тотоу судноһының командирына, — Баренцово диңгеҙендә яңы сельдь промыселен асҡандары һәм үҙләштергәндәре өсөн.

48. Мальченко Андрей Леонидовичкә — эштәр етәксеһенә, Ашкенази Зуся Ильевичкә — спирт промышленносене Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының баш ғилми сотрудниктарына, Гладкий Федор Сидоровичкә — Харьков спирт заводының баш инженерына, Чистяков Михаил Павловичкә — гипроспирт инженерына, — спирт [illegible] эшләп сығарыу методын табыу һәм уны үҙләштергәндәре өсөн, был спирт заводтарының етештереүсәнлеген байтаҡ күбәйтеүҙе тәьмин итте.

49. Мерперт Моисей Петровичкә, Прохоровский Абрам Давидовичкә — Мәскәүҙәге эстән шлифовать итеү станоктары заводының инженерҙарына, — ҙур аныҡлыҡтағы универсаль резьбошлифовать итеү станогы конструкцияһын эшләгән өсөн.

50. Минкович Марк Александровичкә — эштәр етәксеһенә, Ясновский Виктор Самойловичкә, Клевка Валентин Альвиновичкә— азот промышленносе государство институтының ғилми сотрудниктарына, Немцов Владимир Александровичкә — СССР Фәндәр академияһының дөйөм һәм органик булмаған химия институтының профессорына, Розенфельд Исаак Марковичкә — Сталинград химкомбинатының инженерына, — аммиак эшләп сығарыу технологияһын камиллаштерган өсөн.

51. Михайлов Григорий Георгиевичкә—эштәр етәксеһенә, Мәскәүҙәге Сталин исемендәге автомобиль заводының баш конструкторы урынбаҫарына, Феста Георгий Александровичкә, Шепкин Михаил Фокичкә — шул уҡ заводтың конструкторҙарына, — йөк автомобилдәрендә ҡулланыуға передачаһы биш тиҙлектәге коробка менән булған яңы автомобиль двигателе конструкцияһын эшләгән өсөн.

52. Мишин Николай Николаевичкә — сусле культуралар ғилми-тикшеренеү институтының өлкән ғилми-сотрудникенә,—кенаф үҫемлеген эшкәртеү өсөн юғары етештереүсәнлекле машинаның конструкцияһын эшләгәне өсөн һәм уны промышленноскә индергәне өсөн.

53. Наталевич Евгений Ефимовичкә — эштәр етәксеһенә, тимер юл машиналары төҙөү заводтарының баш управлениеһенең проект бюроһы начальнигенең урынбаҫарына, Афанасьев Евгений Владимировичкә, Шастин Виктор Александровичкә — сигнализация һәм связдең баш управлениеһенең инженерҙарына, Зыков Леонид Семеновичкә — Киевтәге «Транссигнал» электротехник заводының инженерына, — тимер юл станцияларында блокировканың яңы системаһын эшләгән һәм тормошҡа ашырған өсөн, был тимер юлда йөрөүҙең хәүефһеҙлеген тәьмин итә.

54. Негруль Александр Михайловичкә — Бөтә Союз үҫемлекселектәр институты профессорына, Журавель Михаил Семеновичкә—шул институттың Урта Азия станцияһының виноградсылыҡ секцияһы мөдиренә, — виноградтың Победа, Ранний вир, Үзбәк мускаты исемле ҡиммәтле яңы сорттарын барлыҡҡа килтергән өсөн.

55. Ненадкевич Константин Автономовичкә — эштәр етәксеһе, СССР Фәндәр академияһының член-корреспондентына, Салтыкова Вероника Сергеевнаға — СССР Фәндәр академияһы геология фәндәре институтының ғилми сотрудникенә, Гинзбург Натан Ильичкә—СССР Фәндәр академияһы геология музейенең өлкән ғилми сотрудникенә, — һирәк металдар ятҡан яңы урындарҙы табып унда тикшереүҙәр үткәргән өсөн.

56. Павлов Анатолий Федоровичкә — эштәр етәксеһенә, Гуз Самуил Юрьевичкә, Кичин Николай Николаевичкә, Синайлов Вячеслав Павлиновичкә — Полевск криолит заводы инженерҙарына, Щенков Влас Власовичкә — Главалюминий инженерена, — химия продукттарын табыуҙа яңы ысул эшләп сығарған һәм уны промышленноскә индергән өсөн.

57. Пархоменко Василий Степановичкә, НИИ-380 лабораторияһы начальнигенә, Ковальчик Татьяна Лаврентьевнаға, Кондрашева Зинаида Никитичнаға, Ипатова Софья Ивановнаға — 682-се завод инженерҙарына, Романюк Константин Бонифатьевичкә — связь средстволары промышленносе Министерствоһы инженерына, — ҙурайтҡыс сығарылыштарын [illegible] массовый рәүештә етештереүҙең яңы технологияһын эшләп табып уны производствоға индергән өсөн.

58. Пачкин Василий Алексеевичкә—эштәр етәксеһе, Главнефтегазстрой начальнигы урынбаҫарына, Боксерман Юлий Израилевичкә — Саратов — Мәскәү газопровод управлениеһы начальнигенә, Щеканенко Аркадий Сазонтовичкә — Главнефтегазстрой начальнигы урынбаҫарына, Платонов Александр Ивановичкә — трубопроводтар төҙөлеш управлениеһе начальнигенә, Борисов Петр Михайловичкә — сварка-монтаж тресы управляющийына, Палта Рувим Соломоновичкә — Саратов—Мәскәү газопроводы проекттаған баш инженерына, Сульженко Ким Матвеевичкә — Саратов — Мәскәү газопроводы управлениеһенең баш инженерына, — алдынғы техник методтар эшләп сығарып, тормошҡа индергән һәм уларҙы Саратов — Мәскәү газопроводы төҙөлешендә камиллаштергән өсөн.

59. Правдинцев Вадим Павловичкә — эштәр етәксеһенә, Пурин Лев Вильгельмовичкә, Тревгод Михаил Александровичкә, Шамарин Борис Николаевичкә — М. В. Ломоносов исемендәге Государство фарфор заводы инженерҙарына, — яңы метод эшләү һәм кварц быялаһы промышленносте эшләп сығарыу аппараттарын камиллаштерган өсөн.

60. Пучков Петр Кузьмичкә — эштәр етәксеһе, Көнбайыш районлыҡтарының нефть промышленносе Министерствоһының нефть эшкәртеү буйынса баш управлениеһе начальнигенә, Исмаилов Рустам Гаджи Али улына — «Азнефтезавод» тресы начальнигенә, Алиев Байаб Сафар улына — шул уҡ берләшмәнең баш инженерына, Маркарян Георгий Георгиевичкә — «Азнефтепроект» тресының баш технологына, — нефть эшкәртеүҙең промышленносте методтарын тамырынан камиллаштергән өсөн.

61. Российский Николай Алексеевичкә — Мәскәүҙең «Калибр» инструменталь заводының өлкән мастеренә, Оснас Яков Вульфовичкә, Корецкова Марина Ивановнаға — шул уҡ завод инженерҙарына, — производстволның технологик процесстарын тамырынан камиллаштергән һәм предприятиелар уҙена тәшеү хаҡын байтаҡ түбәнәйтеүҙе, хеҙмәт етештереүсәнлеген һәм продукцияның сифатын күтәреүҙе тәьмин иткән коллектив стахановсы эш ойоштороған өсөн.

62. Садовский Михаил Александровичкә—СССР Фәндәр академияһының химик физика институты директорының ғилми бүлек буйынса урынбаҫарына, Косачев Михаил Нестеровичкә — «Союзвзрывпром» тресы управляющийына, Медведев Сергей Васильевичкә — СССР Фәндәр академияһы Геофизика институтының ғилми сотрудникенә, — шартлатыу эштәре ваҡытында шартлау сығарылыштарынан ҡоролмалар арауындағы хәүефһеҙ араларҙы билдәләүҙең яңы методын табып һәм уны производствоға индергән өсөн.

63. Салганик Макс Григорьевичкә — Томилин кошсолоҡ фабрикаһының инкубация цехы начальнигенә, — өйрәк йомортҡаларын инкубациялауҙың технологик процесен тамырынан камиллаштергән өсөн.

64. Сарымсаков Ташмухамат Алиевичкә — Үзбәк ССР-ы Фәндәр академияһы президентына, Романовский Всеволод Ивановичкә — Үзбәк ССР-ы Фәндәр академияһының действительный членына, Джорджио Виктор Антоновичкә, Бугаев Виктор Антоновичкә — Үзбәк ССР-ы Фәндәр академияһының математика һәм механика институты сотрудниктарына, — һауа торошоноң ҡыҫҡа ваҡытлы һәм оҙаҡ ваҡытлы прогноздарын төҙөүҙә яңы методтар тапҡан һәм уларҙы практикаға индергән өсөн.

65. Сатовский Борис Ивановичкә — эштәр етәксеһенә, Верник Александр Леонтьевичкә, Борисов Сергей Кузьмичкә, Егошина Юлия Герасимовнаға — С. Орджоникидзе исемендәге Урал ауыр машиналар төҙөү заводы инженерҙарына, Домбровский Николай Григорьевичкә — профессорға, — юғары етештереүсәнле экскаваторҙың яңы конструкцияһын эшләп, уны промышленноскә индергән өсөн.

66. Светличный Афанасий Назаровичкә — эштәр етәксеһенә, Ворошиловск май комбинаты директорына, Аксененко Михаил Романовичкә — шул уҡ комбинат инженерена, Ильин Семен Савельевичкә—Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү май институты инженерена, Науменко Петр Васильевичкә — Главрасжирмасловың баш инженерына,—орлоҡ эшкәртеү буйынса өҙлөкһеҙ хәрәкәт итеүсе экстракцион установканың конструкцияһын эшләгән өсөн.

67. Сидоров Владимир Иосифовичкә — эштәр етәксеһенә, Аникин Прокопий Антоновичкә, Шаманин Владимир Сергеевичкә — Главсевморпуть инженерҙарына, Кармишин Алексей Васильевичкә—ауыл хужалығы Министерствоһы инженерена, Назаров Сергей Васильевичкә — көнбайыш райондарының балыҡ промышленносе Министерствоһы инженерена, — 50 киловатҡа тиклем көүәте булған яңы массовый ел двигателе конструкцияһын эшләгән өсөн.

68. Сидоров Павел Николаевичкә — эштәр етәксеһенә, подшипник промышленносе Үҙәк конструктор бюроһының ауыр машиналар төҙөлешенең подшипниктәр бүлеге начальнигенә, Черкасский Иван Ивановичкә, Волков Николай Михайловичкә, Крюков Савелий Ермолаевичкә—Л. М. Каганович исемендәге беренсе Государство подшипниктәр заводы инженерҙарына, — ауыр машиналар төҙөү өсөн ҙур габарит подшипниктарҙың конструкцияһын эшләгән һәм уны етештереүҙе үҙләштергән өсөн.

69. Смекалин Иван Васильевичкә — эштәр етәксеһенә, Шамардин Николай Николаевичкә — Мәскәү ҡалаһы исполкомының газ хужалығы управлениеһе инженерҙарына, Былинкин Иван Герасимовичкә, Жуков Александр Федоровичкә — Мосгазпроект инженерҙарына, — Мәскәүҙә газ селтәренең оригиналь системаһын эшләп, уны тормошҡа ашырған өсөн.

70. Стекольников Илья Самуиловичкә — СССР Фәндәр академияһының Г. М. Кржижановский исемендәге энергетик институтының юғары вольтлы разряд лабораторияһы мөдиренә, — физиканың һәм техниканың күп кенә өлкәләрендә бик әһәмиәтле булған катодно-осциллографик установка уйлап сығарған өсөн.

71. Стрельчук Николай Антоновичкә — эштәр етәксеһенә, инженер-полковникка, Симонов Вениамин Васильевичкә — инженер-подполковникка, Волков Анатолий Федоровичкә — инженер-майорға, Шаров Николай Владимировичкә — инженер-подполковникка, — янғынға ҡаршы автоматик яңы оборудование конструкцияһын эшләгән өсөн.

72. Сыроватский Сергей Георгиевичкә — эштәр етәксеһенә, Светкова Алевтина Николаевнаға — Ставрополь государство селекцион станцияһының өлкән ғилми сотрудниктарына, Русаков Леонид Федоровичкә — ауыл хужалығы Министерствоһындағы бөртөклө ашлыҡ культураларының сортын һынау государство комиссияһының сотрудникенә, — бөртөклө ашлыҡ культураларының юғары урожайлы сорттарын: Ворошиловская ужым бойҙайын 481, 161, 162 һәм 491 номерле гибридтарҙы һәм пионерка сортлы яҙғы бойҙайҙы үҫтергән өсөн. Был культуралар 700 мең гектарҙан артыҡ сәсеү майҙаны биләйҙәр.

73. Тепкин Сергей Максимовичкә—эштәр етәксеһенә, Чермак Лев Леонтьевичкә, Успенский Николай Федоровичкә, Дроздов Владимир Васильевичкә — Көньяҡ Урал никель комбинатының инженерҙарына, Миронов Александр Алексеевичкә — Главникелькобальттең баш инженерына, — никель таҙартыуҙа яңы методтар эшләгән һәм производствоға индергән өсөн.

74. Терентьев Алексей Васильевичкә — эштәр етәксеһенә, Гипрорыбаның механизация бүлеге начальнигенә, Березин Николай Тихоновичкә — көнбайыш райондарҙың балыҡ промышленносе Министерствоһының баш технологына, Миллер Борис Николаевичкә—балыҡ хужалығы һәм океанографияһы Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының өлкән ғилми-сотрудникенә, Ходос Лазарь Абрамовичкә — көнбайыш райондарҙың балыҡ промышленносе Министерствоһы инженерына, Чернигин Николай Филипповичкә — Главкамчатрыбпромдың баш механигенә,—балыҡ промышленносена күп хеҙмәт талап итеүсе процестарҙы гидравлический механизациялау методтарын эшләгән һәм практик рәүештә производствоға индергән өсөн.

75. Тиходеев Павел Михайловичкә—эштәр етәксеһенә, метеорология Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү институтының профессорына, Карташевская Вера Евгеньевнаға, Сабуренков Александр Матвеевичкә — шул уҡ институттың ғилми сотрудниктарына, — СССР-ҙың яңы яҡтылыҡ эталонын уйлап тапҡан һәм уны халыҡ хужалығына индергән өсөн.

76. Уманский Яков Семеновичкә — эштәр етәксеһе, Мәскәүҙең Сталин исемендәге корос институтының профессорына, Меерсон Григорий Абрамовичкә — Мәскәүҙең М. И. Калинин исемендәге төҫлө металл һәм алтын институты профессорына, Ковальский Александр Евсеевичкә, Левин Григорий Иссековичкә, Сударикова Наталия Андреевнаға — Мәскәүҙең ҡаты сплавтар комбинаты инженерҙарына, — ҡаты сплавтар етештереүҙең яңы методтарын эшләп сығарған һәм уны практикаға индергән өсөн.

77. Уманский Виктор Борисовичкә — эштәр етәксеһенә, Баженов Иван Ивановичкә, Снаговский Евгений Стефановичкә, Васильев Кирилл Владимировичкә, Фурманов Борис Моисеевичкә — Бөтә Союз ғилми-тикшеренеү күмер институтының ғилми сотрудниктарына, Ештокин Афанасий Федоровичкә—«Копейскуголь» тресының 4—6 номерле шахтаһы начальнигенә, — күмер шахталарында механизмдар һәм процестар менән автоматик рәүештә идара итеү методтарын уйлап сығарған һәм производствоға индергән өсөн.

78. Усов Владимир Васильевичкә — эштәр етәксеһенә, Поволоцкая Мария Даниловнаға, Бенько Пелагея Акимовнаға, — 627-се номерле ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына,—электр аппараттары деталдәренең яңы конструкцияларын уйлап сығарған өсөн.

79. Цеймах Ной Лазаревичкә — эштәр етәксеһенә, Челябе образив заводының баш технологына, Барановский Василий Акимовичкә, Гамарник Яков Моисеевичкә, Пудов Виктор Ивановичкә, Хаит Лазарь Иосифовичкә — шул уҡ заводтың инженерҙарына, — керамик связкалы абразив инструменттарҙы термик эшкәртеүҙең яңы технологик процесен уйлап сығарған һәм производствоға индергән өсөн.

80. Целиков Александр Ивановичкә — эштәр етәксеһе, металлургия машиналар төҙөлешенең Үҙәк конструктор бюроһы начальнигенә, Кругликов Абрам Владимировичкә, Рокотян Евгений Сергеевичкә, Гуревич Авриэль Ефимовичкә — технология һәм машиналар төҙөү үҙәк ғилми-тикшеренеү институтының ғилми сотрудниктарына, Шор Эммануил Романовичкә — Бөтә Союз авиация материалдары институтының өлкән ғилми сотрудникенә, — алмаш сечениеңең тиң ныҡлыҡтағы профилдәрен прокатлау өсөн яңы стандар иҗад иткән өсөн.

81. Чередниченко Павел Алексеевичкә — эштәр етәксеһе, «Сарқандаугава» заводының баш инженерына, Подъельский Василий Сергеевичкә — СССР Госплан төҙөлеш материалдары секторының өлкән инженерына, Зуйка Жанис Фрицевичкә — «Сарқандаугава» заводының цех начальнигенә, Бондарев Константин Тимофеевичкә, Забков Федор Ефимовичкә — «Автостекло» заводының инженерҙарына, Чмыхов Алексей Андреевичкә — тәжрибә быяла заводы эргәһендәге конструктор бюроһы инженерына, Карасев Семен Федоровичкә, Харитонов Сафрон Дмитриевичкә — Горький быяла заводының мастерҙарына, — быяла заводтарында эшләп сығарыуҙы байтаҡ арттырыуҙы тәьмин иткән Фурко машиналарында тәрә быялалары һуҙыу эшендә тәжрибәләнгән методтарҙы һәм быяла ҡайнатыу мейестәрендә шахталарҙы йоҡа ҡатламлы итеп ҡултаҡлы ысулдарын эшләп сығарып, уны тормошҡа ашырғандары өсөн.

82. Чернобыльский Алексей Ивановичкә — эштәр етәксеһенә, Кабецкий Юлиан Иосифовичкә, Карабачинская Мария Моисеевнаға, Подклетнов Евгений Николаевичкә, Макаров Борис Александровичкә — Ленинград Химия-аҙыҡ комбинаты инженерҙарына, Варгин Владимир Владимировичкә — Ленсовет исемендәге Ленинград технология институттың профессорына,—кислоталарға сыҙамлы эмалдәр составын уйлап сығарған һәм СССР-ҙа яңы, кислотаға сыҙамлы эмалировать ителгән корос аппаратураларҙы етештереүҙе үҙләштергән өсөн.

83. Чугреев Николай Самойловичкә — эштәр етәксеһенә, Гавлевский Григорий Давыдовичкә, Школьник Людмила Абрамовнаға, Шебуев Алексей Николаевичкә, Масанов Николай Ивановичкә — Фрунзе исемендәге Дорогомиловка химик заводының инженерҙарына, Тихомиров Сергей Михайловичкә — Химик промышленносте министры урынбаҫарына, — аппаратураларҙың эшләп сығарыуын байтаҡ арттырыуҙы һәм производствоның зарарлылығын кәметеүҙе тәьмин иткән бензидин-сульфат эшләүҙең яңы методтарын тапҡандары һәм уны тормошҡа ашырғандары өсөн.

84. Эльпсберг Максим Ефимовичкә — эштәр етәксеһенә, Когель Павел Григорьевичкә, Кирьянов Алексей Ивановичкә — Свердлов исемендәге заводтың конструкторҙарына, — махсус станоктарҙың яңы конструкцияһын эшләп сығарғандары өсөн.

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛЫ— ЯҢЫ БИШ ЙЫЛЛЫҠТЫҢ МӨҺИМ ТӨҘӨЛӨШӨ

Трассала эшләүселәр өсөн промтауарҙар

Ишембай — Ермолаевка тимер юлында эшләүселәрҙе продукттар һәм промтауарҙар менән тәьмин итеү өсөн төҙөлештә ОРС-ы ойошторолған. Оценочный мең баш Башкоптортторг сауҙа Министерствоһы һәм Башкоопсоюз трассаға күп һанда промтауарҙар ебәрҙе.

Сауҙа Министерствоһы тарафынан был маҡсатҡа бүленгән фондтан беренсе партия промтауарҙар эшселәр бер вагон шырпы, бер вагон махорка, бер вагон тәрә быялаһы, сәй, тегелгән кейемдәр; Башкоопсоюз тарафынан бүленгән тауарҙар иҫәбенән 8 мең килограмм кондитер изделиеләре, балыҡ һәм башҡа тәрә әйберҙәр бар.

Трассала Макар, Стәрлетамаҡ, Малаяз, Федоровка, Көйөргәҙе, Стәрлебаш һәм Воскресен райпотребсоюздары үҙ балаларының тауарҙар менән сауҙа итеүҙе ойошторалар.

Участкаларҙа связь

Ишембай, Аллағуат, Ерғән, Малаяз һәм Ермолаевка телефон станцияларын тимер юл төҙөлөш участкалары менән телефон бәйләнештерен юлға һала башланылар.

Төҙөлештә эшләүселәргә һатыу өсөн мең дананан артыҡ ҡул һәм өлкә газеталар бүленде. Был «Союзпечатьтың» районы бүлеге работниктары эшселәр араһында пәртөп һатасаҡтар.

Удар төҙөлөштә—удар эш ойоштороғоҙ

СТӘРЛЕТАМАҠ. (Телефон аша). Башҡортостандың биш йыллыҡ төҙөлештәренең берсе булған Ишембай—Ермолаевка тимер юл төҙөлешенә башланды. Башҡортостан Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты был төҙөлешкә—халыҡ төҙөлешене тип иғлан итте. Беҙҙең район колхоздарынан яңы юл төҙөүгә иң мең йәйәүле һәм иң йөҙ атлы колхозсы ҡатнашыра, ҡырҡ көн эсендә 256 мең кубометр ер эштәре башҡарылырға тейеш.

Хәҙер районыбыҙ ауыл Советтарын, колхоздарына эшсе һәм йәнлекселәр ебәрә башланылар, ер эштәренә ҡулсы задаанеләре бүлендәлде. Шулай уҡ задаанеләрҙе һәр бер колхоздың үҙ бригадаһы ҡорыл, ҡорыл, дом, носилка менән тәьмин итеүе ҡуҙа тотола.

Трассала эшлә сауҙы кенәп тиклем күп кеше ойоштороу сараларына урыҡ бар. «Ишембай—Ермолаевка тимер юлы—халыҡ төҙөлешө» тигән темала докладтар яһаласаҡ.

Шулай уҡ районда сауза, наулыҡ һаҡлау, культура-ағартыу учреждениелары ла трассала эшләүсе колхозсыларҙы хеҙмәтләндереү буйынса әҙерлек эштәре алып баралар.

Республиканың башҡа күп районнары менән Стәрлетамаҡ районы колхозсылары ла Өфө — Ишембай юлын төҙөүҙә удар эшләнеләр. Был юлдың дауамы — Көйөргәҙе күмерено юл һалыуҙа ла беҙҙең колхозсыларҙың үҙ тейеш менән эшләйәсәк. Трассала эшләүсе колхозсылар көнгә түгел, э бер айҙа әммаллау бурыҫын ҡуйҙы. Быға эшсе һәм тарттыу көстәре һанын арттырыу иҫәбенә түгел, э урында эште дөрөҫ ойоштороу, социалистик ярыштың киң йәйелдереү иҫәбенән стахановсы хеҙмәт менән өлгәшәсәкбеҙ. Сәйен беҙ юл төҙөлешенә тиҙ тамамлап, күп илем тиҙерәк тамамлабыҙ, урожай йыйыу һәм государствоға иген тапшырыу эшен тулы дәрәжә менән башлауға мөмкин буласаҡ.

В. Макарушкин,
Стәрлетамаҡ районы Советы исполкомы председателе.

КУСТОВОЙ КӘҢӘШМӘ

4 июнда Стәрлетамаҡта Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлешенә эшендә ҡатнашыусы Макар, Көйөргәҙе, Федоровка, Күгәрсен, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Ауырғазы һәм башҡа районнарҙың райсовет исполкомдары председателдәре, райкомдары секретарҙарының һәм партия райкомдары секретарҙарының кустовой кәңәшмәһе булып үтте. Кәңәшмәлә юл төҙөүгә эшсе һәм йөнле тартыу көстәре сығарыу, трассала эште ойоштороу сарала билдәләнде.

Медицина ярҙамы

Ишембай — Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә эшләүселәргә медицина ярҙамы ойоштороу буйынса Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау Министерствоһы ла күп кенә бурыстар йөкмәтте. Хәҙер был бурыстарҙы үтәүгә бер сараларҙы билдәләне.

Юл төҙөлешендә 6 урында — Ишембай, Ерғәндә, Малаяҙ, Самаровка, Алексеевкала, Ермолаевкала махсус медицина пункттары асыла. Бынан тыш төҙөлештә ҡатнашыусылар хеҙмәтләндереү өсөн һәр бер 5 километр араһы йәрен фельдшерҙар беркетелә. Урындарға инде медицина работниктарынан 15 кеше сығарыла, фельдшер пункттарына 3000 дана индивидуаль пакет ебәрелә.

Яҡын арала Министрствола трассаға үҙенең эпидемиологик сығара. Ул был эштә төрлө прививкалар булдырыу буйынса профилактик саралар ойоштораса.

Урындарға дезинфекция үткәреү өсөн ҡорал ебәрелә. Малаяҙ, Ерғән, Самарова пункттарында дезинфекциялар булдырыу һәм душ үткәреүселәрҙе бар. Юл төҙөлешендә йәшәй торған урындарға дезинфекция үткәреү өсөн хлор, аш һәм башҡа материалдар ебәрелә, дезинфекциялау өсөн бактериофаг ебәрелә.

Юл төҙөлешендә ҡатнашыусы райондарҙың колхозсылар һәм медицина работниктары ла килә. Улар үҙ райондарының колхоздары эшләүселәргә трассала ҡаласаҡтар.

В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу алдынан



ҺҮРӘТТӘ: В. Г. Белинский «Современник» редакцияһында Достоевскийға һәм Некрасовҡа «Ярлы кешеләр»ҙе уҡый.
Художник Лебедев һүрәте. ТАСС фотохроникаһы.

В. Г. Белинский тәрбиә тураһында

Революцион-демократ, крепостной королощка ҡаршы ҡыйыу көрәшсе Виссарион Григорьевич Белинский, бөйөк тәнҡитсе булараҡ, тәрбиә мәсьәләһенә лә ҙур иғтибар бирҙе.

Үҙенең күп кенә рецензияларында В. Г. Белинский тотош педагогик система ла асты. Крепостной тәрбиәне әсе тәнҡитләп, уның бер ниндәй ҙә тәрбиә булып тормауын билдәләне ул. «Тәрбиә! Ул, ҡайҙа ҡарама, шунда бар, ләкин ул бер ерҙә лә юк... Әгәр тышкы әҙәплелеккә һәм манераларға ғына иғтибар иткәндә, балаларға тышкы тәрбиә генә бирелә. Бындай тәрбиә һөҙөмтәһендә «тормошто аҙ белеүсе йәштәр» арҫлан тупаҫлығы менән һеҙгә үҙҙәренең дәрәжәттәрен юналтәләр, үҙ телдәрендәгеләй, иркен, тотанаҡһыҙ рәүештә французса һөйләшәләр һәм русса ике һөйләмде яҡшылабыраҡ бәйләп һөйләй, русса һүҙҙәрҙе орфографик хаталарһыҙ яҙа белмәйҙәр», ти Белинский. Ошондай тәрбиәнә һүрәтләгәндә, белем биреүҙең төрлө ҡатламдар өсөн төрлөсә булыуы, тар практицизм һәм профессиялаштырыу, крепостной тәрбиәнең карьеризмы: был тәрбиәнең принципһеҙлеге Белинскийҙе нык борсой. Ул үҙе йәшәгән заман Россияһында мәсьм мәғәнәһендә мәғариф эше булмаһа лә, халыктың белемгә ынтылыуын күрә белде: «Беҙҙең халыҡ белемдән ҡурҡмай, киреһенсә, уны һөйә, уға ынтыла», тине ул.

Кешене бөтә яклап тәрбиәләү идеяһын алға һөрөп: «Тәрбиә кешенең яҙмышын хәл итә. Кешенең төп бурысы — бөтә эшмәкәрлегендә, тормошонон барлыҡ бас[illegible] — кеше булыу[illegible]», — ти Белинский. Шулай уҡ: «Кем кеше булып етмәгән, ул насар гражданин!», тине бөйөк [illegible]. Был — иң социаль [illegible] булды уҙ заманында.

[illegible]

ка, физика, тәбиғәт фәндәре тора.

Ул уҡытыу методикаһына ҡағылған күп кенә ҡиммәтле фекерҙәр әйтте, уҡытыуҙағы «стандарт» методтарға ҡиҫкен ҡаршы булды. «Үҙегеҙҙең уҡытыу методтарығыҙҙы, баланың үҫә барыуын иҫәпкә алып, үҙгәртә барығыҙ», тип өйрәтте ул. Белинский яҡшы методтар тип балала талант үҫтерә, уға дөрөҫ йүнәлеш бирә торған методтарҙы иҫәпләне. Уҡытыуҙың йәнлелеге һәм күрһәтмәлелеге, һөйләүҙең асыҡлығы һәм ышандырғыслығы, балала үҙ алдына уйлау һәм хәрәкәт итеү булдыҡлылығы тәрбиәләү — яҡшы методиканың иң кәрәк сифаттары. Белинскийсә, күрһәтмәлелек—«баланың үҫешенең нигеҙе булырға тейеш». Балаларҙы тарих, география, тәбиғәт һәм фәндең башҡа өлкәләре менән таныштырғанда, балаларға аңларлыҡ итеп һөйләргә кәрәк.

Белинский, рус теле, әҙәбиәт, тарих хаҡында һөйләгәндә, уларҙы уҡытыу тураһында тулы методик күрһәтмәләр бирә. Октябрь революцияһынан 80 йыл элек, ул «ять» һәм «ъ» хәрефтәрен бөтөрөүҙе талап итте.

Уҡыусыларҙың һөйләү һәм яҙыу телдәрен үҫтереүҙе талап итеү менән бергә, Белинский бөйөк рус яҙыусыларын өйрәнергә саҡырҙы һәм айырыуса көс менән Пушкин, Гоголь, Крылов әҫәрҙәренең халыҡсанлығы идеяһын алға һөрҙө.

Белинский ул ваҡыттағы тарих уҡытыу эшенең торошона ҡырҡа ҡаршы сыҡты. Ул саҡта тарих уҡытыу бер-береһенә бәйләнешһеҙ фактылар йыйнауға, тарихи анекдоттар һөйләүгә һәм монархияны [illegible]

[illegible]

Ул балаларға халыҡ йырҙарын, халыҡ ҡараштарын, рустың үҙ тормошон сағылдырған әҫәрҙәр бирергә кәрәк. [illegible] Бөйөк Петр, Иван III тураһында белдерҙе.

[illegible]

В. Г. Белинскийҙең педагогик ҡараштары XIX быуаттың беренсе яртыһында Россия өсөн генә түгел, башҡа илдәр өсөн дә алдынғы ҡараштар булдылар. Уларҙа прогрессив педагогиканың бөйөк демократизм, халыҡсанлыҡ, патриотизм, гуманизм, фәннилек, балаларҙы [illegible] [illegible] эске йылы [illegible]

П. Чижов,
БАССР-ҙың атҡаҙанған фән деятеле.

В. Г. БЕЛИНСКИЙ ТУРАҺЫНДА ҒИЛМИ ДОКЛАДТАР

Ошо көндәрҙә К. А. Тимирязев исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия институтында В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл тулыуға арналған ғилми конференция булды.

Конференцияла рус әҙәбиәте преподавателе Прокшин «Белинский — тәнҡитсе», философия фәндәре кандидаты доцент Масленников «Белинскийҙең философик ҡараштары», БАССР-ҙың атҡаҙанған фән деятеле доцент Чижов [illegible] фәндәре кандидаты Нигматуллин «Тарих һәм Белинский» тигән темаларға докладтар яһанылар.

Н. [illegible]

Биш йыллыкты — дүрт йылда!

Иптәш Сталингә биргән вәғәҙәбеҙҙе үтәүҙә стахановса эшләрбеҙ!

Туймазы нефтселәренән ҙур группа иптәштәр хөкүмәт орденДәре һәм медалдәре менән наградландылар. «Туймазынефть» тресы үҙе Ленин ордене менән наградланыуға лайыҡ булды. «Икенсе Бакуҙы» барлыҡҡа килтереүсе нефтселәр тураһында сталинсе хәстәрлек нефтселәр араһында яңы производство һәм патриотик активлек тыуҙырҙы.

— Нефть биш йыллығын дүрт йылда үтәү тураһында иптәш Сталингә биргән вәғәҙәбеҙҙе стахановсы эш менән аҡларбыҙ!

Юғары наградаға Туймазы нефтселәре шулай яуап бирәләр һәм бөгөн газетабыҙҙа урынлаштырылған сығыштары уларҙың һүҙҙәре эштәренән айырылмауы тураһында һөйләйҙәр.

Кадрҙар — уңышты хәл итә

Е. ВАРЕНОВ — икенсе промыселдең беренсе участка мастере

Икенсе промыселдең беренсе бригадаһы «Туймазынефть» тресының иң ҙур бригадаларҙан береһе. Беҙҙең участкала хәҙер девон скважиналары бер нисә тиҫтәгә етә.

Участканың нефтселәре биш йыллыкты дүрт йылда үтәү, ағымдағы йылдың планын срогынан алда тамамлау өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр. Үткән йылда беҙ планды срогынан алда үтәп, Тыуған илебеҙгә пландан тыш ундарса мең тонна нефть бирҙек. Быйыл апрель, май айҙарында пландан тыш меңдәрсә тонна нефть сығарҙыҡ.

[illegible]

Беҙ кадрҙарыбыҙ менән ошолай эшләйбеҙ. Кадрҙар менән даими эш алып барыу, уларҙы тәрбиәләү участканың ритмле эшләүенә өлгәшеүҙә ҙур роль уйнаны.

Юғарылатылған йөкләмәбеҙ ҙә үтәлер

А. ЕРОНИН — беренсе номерле промысел директоры

Беренсе промысел «Туймазынефть» тресы күләмендә генә түгел, бәлки «Башнефть» берекмәһе буйынса ла иң ҙурыһы һәм Октябрьск промыселдәре араһында иң алдынғыһы булып тора. Беҙ дүрт айлыҡ планды срогынан алда үтәп, пландан тыш меңдәрсә тонна «ҡара алтын» бирҙек. Майҙың ун биш көнөндә планды 105 процентҡа үтәп, Октябрьск нефтселәренең социалистик ярышында тағы ла алдынғылыҡты алдыҡ.

Промыселдең фонды бораулаңып эксплоатацияға тапшырыла барған яңы скважиналар иҫәбенә тулыландырыла барыла. Нефтселәр коллективы бөтә скважиналарҙың нефть биреүен арттырыу өсөн көрәшәләр.

Беҙ фонтанлы скважиналарҙа парафинға ҡаршы даими көрәш алып барабыҙ, шуның һөҙөмтәһендә нефть баҫымының түбәнәйеүенә юл ҡуймайбыҙ. Тәрән насослы скважиналарҙа станок-качалкаларҙың һәм насостарҙың өҙлөкһөҙ эшләүенә өлгәшәбеҙ.

Промыселдең алдынғы һәм өлкән операторҙары Любовь Ткачева, Сабирьян Идиятуллин, Әхмәт Бикбаев һәм башҡа күптәр үҙ скважиналарының өҙлөкһөҙ, аварияһыҙ эшләүҙәрен тәьмин итеүҙә, билдәләнгән заданиеләрҙе арттырып үтәүҙә өлгө күрһәтәләр.

Беҙҙең промысел эшселәренән, инженер-техник работниктәренән ҙур төркөмдөң хөкүмәт наградаһы менән наградланыуы нефтселәр араһында ҙур хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Промыселдең коллективы быға яңы производство уңыштары менән яуап бирергә ҡарар итте.

Участкаларҙа һәм промыселдә үҙгарылған производство кәңәшмәләрендә, дөйөм йыйылышта беҙ тәүге йөкләмәләребеҙҙе һәм ойоштороу-техник саралар пландарын ҡайтанан ҡарап сыҡтыҡ. Ошолар нигеҙендә промысел коллективы тәүге йөкләмәлә ҡаралған 30 мең тонна урынына, хәҙер пландан тыш 35 мең тонна нефть биреү йөкләмәһен алды. Нефтселәр һәр тонна нефттең үҙенә төшөү хаҡын планда билдәләнгәнгә ҡарағанда 5 процентҡа түбәнәйтеү бурысын ҡуйҙылар. Беренсе июндән бөтә цехтар ҙа хужалыҡ иҫәбе менән эшләүгә күсереләләр. Юғарылатылған йөкләмәбеҙ ҙә үтәлер.

Инженер-техник работниктәр өсөнсө кварталда скважиналарҙың забойҙарына парафиндең ултырыу сәбәптәрен асыҡлау һәм уға ҡаршы көрәшеү буйынса тикшеренеү эшен тамамларға ҡарар иттеләр.

Был йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәү совет нефтселәре тураһында партия һәм хөкүмәттең атайҙарса хәстәрлегенә беҙҙең иң яҡшы яуабыбыҙ булыр.

Бөтә скважиналарҙың да өҙлөкһөҙ эшләүенә өлгәшергә

С. ИДИЯТУЛЛИН — беренсе промыселдең өлкән операторы

Бөтә скважиналарҙың да өҙлөкһөҙ эшләүенә өлгәшергә мөмкинме? Әгәр тәбиғи баҫымға бәйләнешле булмағанда, нефть баҫымының түбәнәйеүенә юл ҡуймайынса, өҙлөкһөҙ нефть биреп торорға мөмкинме?

Һис һүҙһеҙ мөмкин. Мин быны үҙ эш тәжрибәм менән раҫлай алам. Минең бөтә ун скважина ла (уларҙың етеһе тәрән насослы) өҙлөкһөҙ эшләй һәм уларҙың бөтәһендә лә нефть сығарыу заданиеләре арттырылып үтәлә.

Скважиналарҙың өҙлөкһөҙ эшләүенә мин нисек өлгәшәм? Яҡшы слесарь булыуым менән бер рәттән, балта эштәре, электр техникаһы мәсьәләләре менән дә яҡшы уҡ танышмын. Уларҙы белеү миңә станок-качалкаларҙың һәм насостарҙың торошон дөрөҫ билдәләүгә ҙур ярҙам итә. Шуға күрә мин алдан уҡ, эш процесендә оборудованиеләрҙе ҡарап тәртипкә килтерәм, майлап сығам. Оборудованиеләрҙе алдан ошолай профилактик ремонтлау һәм тәртипкә килтереү уның боҙолоуына юл ҡуймай. Унан ары, был саҡта станоктар һәм насостар оҙаҡҡа сыҙайҙар.

Мин хеҙмәтләндергән скважиналар төрлө урынға урынлашҡандар. Уларға обход яһағанда, ваҡытты бушҡа үҙгармаҫ өсөн, мин махсус сумкаға үҙем менән бергә бөтә кәрәкле инструменттарҙы, һәр төрлө ҙурлыҡтағы асҡыстарҙы алам.

Тәрән насослы скважиналарҙа электр моторҙарын, мотор менән станокты тоташтыра торған ҡайышты ентекле рәүештә ҡарауға айырыуса иғтибар итергә кәрәк. Мин шулай эшләйем дә. Сөнки уларҙың тәҙәк булыуы эштең уңышын хәл итә.

Көстәрҙе дөрөҫ урынлаштырырға

А. КАЗАЧЕНКО — беренсе промыселдең дүртенсе участка мастере

Был участкала мин үткән йылдың ноябрь айынан бирле эшләйем. Участкаға килгәс тә эшсе көстәрҙең дөрөҫ урынлаштырылмауы һәм хеҙмәттең дөрөҫ ойошторолмауы күҙгә бәрелде.

Беҙ эште ошо етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙән башланыҡ. Әгәр элек беренсе скважинала юғары разрядле операторҙар эшләһә, ә икенселәрендә өс-дүртенсе разрядле кешеләр эшләй инеләр. Беҙ скважиналарға өлкән операторҙар итеп бишенсе-алтынсы разрядлеләрҙе, ә уларҙың ярҙамсылары итеп квалификацияһы түбәнерәк булған кешеләрҙе ҡуйҙыҡ. Был эште яҡшыртыуҙа ыңғай һөҙөмтәләр бирҙе.

Скважиналарҙың торошо өсөн, нефть сығарыуҙы арттырыу өсөн операторҙарҙың яуаплылыҡтарын күҙәтеү — мөһим эш. Бының өсөн бына нәмәләр эшләнек.

Вахтаны тапшырған һәм ҡабул итеп алған ваҡытта скважинаның ниндәй торошта һәм күпме, ниндәй инструменттар тапшырылыуын һәм башҡа бөтә нәмәләрҙе журналдарға яҙып барырға булдыҡ һәм шулай эшләйбеҙ. Унан ары скважиналарҙы таҙартыу өсөн күсмә припаркалау машиналарын, штуцерҙарҙы көтөп тормайбыҙ. Штуцерҙарҙы аҙнаға бер тапҡыр урынына тәүлегенә бер тапҡыр таҙарта башланыҡ. Аҙаҡ килеп, хәҙер вахтаны яңы сменаға тапшырыу алдынан һәр бер оператор скребтәрҙе үҙе скважинаға төшерә һәм уны сменаны алмаштырыусы алдында күтәрә. Һөҙөмтәлә хәҙер бөтә операторҙар ҙа скребтәрҙе скважиналағы парафиндәр ҡатламына тиклем төшерәләр. Ә элек эшкә яуапһыҙыраҡ ҡараусы ҡайһы бер операторҙар биш йөҙ эте йөҙ метр урынына йөҙ илле-ике йөҙ илле метр тәрәнлегенә генә төшерәләр ине һәм шунлыҡтан скважина нефтте лә аҙ бирә башлай торғайны.

Беҙҙең скважиналар, бер участканан башҡалары, бөтәһе лә фонтан скважиналар. Шуға күрә беҙ скважиналарҙағы аварияларҙы тулыһынса бөтөрөү сараларын күрәбеҙ. Ярты йыл ваҡыт эсендә участкала тик бер генә тапҡыр скребтең өҙөлөү (обрыв) ваҡиғаһы булды, унда ла заводтың ғәйебе менән.

Беҙ скребтәрҙең өҙөлөүҙәрен бөтөрөүгә нисек өлгәштек? Бөтәһенән элек уларҙы даими рәүештә тикшереү арҡаһында. Тикшереү графиктәре төҙөнөк. Мастер ес көн һайын уларҙың торошон тикшерә. Унан һуң беҙ канат менән тимер сыбыҡ ҡушылған урындан 15 көнгә бер тапҡыр 10 метр оҙонлоғонда тимер сыбыҡты алып ташлайбыҙ.

Участка беренсе промыселдә алдынғыларҙың береһе булып тора. Биш йыллыҡ планды үҙ участкабыҙ буйынса өс йыл ун ай эсендә тамамлаясаҡбыҙ.

Төрәкмән тау итәгендә

Боролма-боролма һуҙылған юл барған һайын юғары күтәрелә. Элек ауыл, ә хәҙер Октябрьск ҡалаһы янындағы эшселәр посёлкаһына әүерелгән Төрәкмәндән үтеп, Московка посёлкаһы аша китә был юл. Ҡаланан барғанда юлдың уң яғында Төрәкмән тау итәге һуҙылып китә, ә һул яҡта тулы һыулы Ыҡ йылғаһы аға.

Көндөҙ ҙә, төндә лә яҡты был юлда. Октябрьскиҙан Московка посёлкаһына тиклем һуҙылған был юлдың ике яғында тәүлек әйләнәһенә факелдәр яна. Улар—мастер Мәғруф Хәсәнов етәкселек иткән участкалағы скважиналарҙың факелдәре.

...Йылғаның яр башында ҡырҡ метр бейеклегендәге металл вышка ултыра. Бында бораулау эше тамамланған. Ул икенсе буровойға күсерелгәс тә, уның урынына бәләкәй вышка ҡуйыласаҡ. Икенсе промыселдең етенсе вышкаһы был. Участка мастере Мәғруф Хәсәновты ошо вышка янында осратҡанда уның Почет билдәһе ордене менән наградланыуы тураһында хәбәр килгән көн ине. Кешеләр уны награда менән ҡотлайҙар.

—Әлбиттә, — тип яуап бирә Хәсәнов ҡотлаусы иптәштәренә.— награда өлгәшелгәндәр өсөн. Ләкин ул артабан тағы ла күберәк, тағы ла яҡшыраҡ эшләү бурысын йөкмәтә.

Ул ошо Төрәкмән ауылында тыуып үҫкән кеше. Хәҙер инде Төрәкмән ауылы үҙгәрҙе — Октябрьскиҙең мөһим нефть үҙәгенә әүерелде. Уның тирә яғын вышкалар урманы ҡаплап тора. Тап бына ошо участкала Төрәкмән егете Хәсәнов етәкселек итә.

Бынан һигеҙ йыл элек ҡара эшсе булып килгән, хеҙмәт һөйөүсе Мәғруф промысел менән бергә үҫте. Оператор, өлкән оператор, мастер ярҙамсыһы, участка мастере... Уның үҫеү баҫҡысы шулай. Ул участкалағы һәр бер скважина, һәр бер кеше тураһында ентекләп һөйләй. Ә һүҙ үҙе тураһында башланһа бөтөнләй башҡаса. Сөнки ул маҡтанырға яратмай.

Етенсе скважинала йәш кенә ҡыҙ Тәзкирә Хөснуллина вахтаһы эшләй ине. Ул да Төрәкмән ауылыныҡы.

Фонтан скважиналарында вахтала булыусыларҙан бер нәмә — скважинаның забойына парафин ултырмауы, уның өҙлөкһөҙ эшләүе генә түгел, бәлки нефть сығарыуҙың түбәнәймәүенә өлгәшеү талап ителә.

Тәзкирә Хөснуллина бөтә көсөн һалып эшләй һәм шуға күрә лә уның скважинаһы һәр ваҡыт нефтте графикта билдәләнгәнгә ҡарағанда күберәк бирә.

— Был уңышҡа нисек өлгәшә алаһың?

— Мин скребтә скважинаға сәғәт ярым һайын төшөрөп торам һәм уны парафин ҡатламына тиклем еткерәм. Вахтаның аҙағына штуцерҙе парафиндән таҙартам, — ти ул.

Уның скважинаһы эргәләре һәр ваҡыт таҙа, йыйнаҡ була. Шулай уҡ скважинаһының бөтә арматураһы ла таҙа тотола.

— Был да шулай уҡ мөһим, — тине беҙгә мастер Хәсәнов.—Операторҙың йыйнаҡ, дисциплиналы булыуы, эш урындарының таҙа һәм тәртипле тотолоуынан уҡ хөкөм итеп була.

Тәрән насослы скважиналарҙа эшләүсе оператор Петр Маликовты участкала кемдәр генә белмәй. Ул промыселда йылдан артығыраҡ ҡына эшләй, ә шулай ҙа ул был ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә промысел эшенең техникаһын яҡшы үҙләштереүгә өлгәште. Петр Маликов хәҙер бер үҙе дүрт скважинаны хеҙмәтләндерә һәм үҙ эшен яҡшы башҡарып килә. Хеҙмәтте рациональ файҙаланыу промыселгә башҡа эштәргә өҫтәмә эшсе көстәре бирҙе, ә был, үҙ нәүбәтендә, меңдәрсә һум государство средстволарына экономия яһаны. Улар бөтәһе лә икенсе промыселдең операторҙары, мастерҙары тарафынан уйланып ижад ителгән эштәр.

Октябрьскиҙа Зия Хөснөтдиновты кем генә белмәй. Ябай оператор булып эшләгән сағында уҡ әле уны маҡтап һөйләнеләр. Бер йылдан һуң уға бишенсе разряд бирелә. Әлеккә тракторист — бөгөн «Туймазынефть» тресының иң алдынғы нефтселәренән береһе.

Бынан ярты йыл элек Зияны мастер Хәсәнов участкаһында өлкән операторлыҡҡа күсерттеләр. Уға иң алыҫ һәм шул уҡ ваҡытта «сирле» скважиналар тапшырылды. Нефть баҫымы ла йыш ҡына түбән ине. Хөснөтдинов скважиналарҙы дөрөҫ эксплоатациялай белеүе, штуцерҙарҙы үҙ ваҡытында һәм дөрөҫ регулировать итеүе арҡаһында скважиналарҙың нормаль эшләүен тәьмин итә алды.

Зия Хөснөтдиновтың ҡыйыулығын, инициативалылығын күрһәтеү өсөн ошо бер генә фактты килтерәйек. Бер ваҡытта галля сынйыры стройҙан сыға. Аварияны бөтөрөү өсөн трактор талап ителә. Яҙғы бысраҡ ваҡыт, скважина районына трактор инерлек түгел. Скважинала телефон да юҡ. Промыселдең контораһына барып-ҡайтыу өсөн күп тигәндә бер көн ваҡыт кәрәк. Ҡыйыу оператор был хәлдән сығыу, аварияны урында бөтөрөү юлын үҙе уйлап таба. Трактор-подъемник урынына ул станок редукторын станок моторы көсө ярҙамында күтәрә. Шулай итеп ул, өс сәғәт ваҡыт эсендә скважинаны ходҡа ебәрә.

Участкала һоҡланғыс кешеләр эшләй. Улар бөтәһе лә бер уй, бер теләк менән—Тыуған илебеҙ күпме талап итһә, шул тиклем нефть биреү, бөйөк юлбашсыбыҙ Сталингә биргән вәғәҙәне үтәү теләге менән солғап алынғандар. Улар ҙур ижади эш алып баралар.

И. Болдогоев.

Беҙҙең республикала

Тимер юл Министрлығының 97/2 номерлә төҙәлешендә. Былда тимер юлдың Өфө узелы юлсылары өсөн торлаҡ йорттар төҙөлә. Һәр ҡайһы ике квартиралы ете йорт һалынасаҡ.

Һүрәттә: ташсы М. Н. Сахаров иптәш йәш специалист Р. Б. Мансуровтың (унда) эш сифатын тикшерә.

В. Жданов фотоһы.

Агрегат заводы рационализаторҙарының уңыштары

Өфө агрегат заводы рационализаторҙарының ағымдағы йыллыҡ 5 айы эсендә булған эштәрен йомғаҡ яһаны. Ошо ваҡыт эсендә эшселәрҙән һәм инженер-техник работниктарҙан 65 тәҡдим алынды. Рационализаторлыҡ тәҡдим индереүселәрҙең һаны, үҙған йылдың ошо ваҡытына сағыштырғанда, 1,5 тапҡырға артыҡ. Производствоға индерелгән тәҡдимдәр буйынса йыллыҡ экономия 480 мең һум тәшкил итә.

Инженер Захаров, цех начальниге Кадзоев, конструкторҙар Мясников, Чурусов, стахановсылар Гәрәйтуллин, Бабеншов һәм Анисимов иптәштәр һуңғы ваҡытта айырыуса кимматле тәҡдимдәр индерҙеләр. Уларҙың тәҡдимдәрен тормошҡа ашырғанда йылына 50 тоннанан артыҡ майлау материалдары һәм 700 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһаласаҡ. Шулай уҡ күп кенә операцияларҙа хеҙмәт етештереүсәнлеге бер ниса тапҡырға арттырыласаҡ.

Комбайнерҙәр яуабы

ӘУБИРҒАҘЫ. Штанлы МТС-ы комбайнерҙәре урожай йыйыуға әҙерлек эштәрен киң йәйелдерҙеләр. 20 майға 21 комбайндың һигеҙе ремонттан сыҡты. Ҡабул итеү комиссияһы ремонттың сифатын яҡшы, тип тапты.

Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинга яҙған хаттары комбайнерҙәр араһында ҙур политик һәм хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Механизаторҙар комбайндар ремонтлау планын 15 июнгә тамамларға һүҙ бирҙеләр. Комбайнер Асеев һәм Левин иптәштәр бер «Сталинец» комбайны менән 700 гектар, Гутчев, Тимошенко, Фомин һәм башҡа иптәштәр «Коммунар» комбайны менән 600-әр гектар игеп урырға йөкләмә алдылар.

Завод ритмле эшләй

Коллектив ритмле һәм берҙәм эшләй. Эшлеп сығарыу темпы көндән-көн арта. Инженер-техник работниктар һәм эшселәр иртәгә бөтөнгөнән яҡшыраҡ эшләү теләге менән йәшәйҙәр.

Черниковск химик заводының коллективе ныҡышмалы хеҙмәт һөҙөмтәһендә май айы программаһын срогынан 8 көн алда үтәне.

Хәҙер был предприятие кешеләре ярты йыллыҡ планды үтәү алдында. Улар бөйөк байрам — 7 ноябрьгә йыллыҡ заданиене үтәү өсөн яңы йөкләмәләр алдылар.

Медицина институтында

Бөгөнгә ҡәҙәр Башҡорт государство медицина институтының республикабыҙҙың 1.144 йәш кенә врач булырға әҙерләнә. Шуларҙың 160-ы медицина фәндәрен тик отличнога ғына үҙләштерә. Ошо отличниктар эсенән: 5-се курс студенттәре Р. Терегулов, Е. Кузнецова, С. Назирова, 4-се курстан К. Кованов, А. Назирова, 3-сө курстан Р. Мельникова, Л. Князева иптәштәр Сталин стипендияһы алалар.

Хәҙер институтта экзаменацион сессия бара. Сессияны уңышлы үткәреүгә бөтә саралар күрелә. Экзамендарға әҙерләнеүселәр өсөн уҡыу залынан башҡа айырым бүлмәләр бүлдәләнде. Библиотеканың эш сәғәттәре арттырылды. Бында китаптар төрлө фәндәр буйынса һайланып айырылып ҡуйылды. Студенттар кәрәкле әҙәбиәтте тиҙ һәм ваҡытында таба алалар. Бөтә кафедраларҙа ла көн буйына консультациялар эшләй.

Экзамендарҙың тәүге көндәре студенттарҙың яҡшы әҙерләнгәнен күрһәтте. Мәҫәлән, 3-сө курстар ошо көндәрҙә паталогик физиология буйынса экзамен бирҙеләр. Күпселек отлично һәм яҡшыға ғына тапшырҙылар. Ҡәнәғәтләнмәслек билдә алыусылар булманы.

Институт быйыл 270 врач сығара.

Еңеүселәргә кубок тапшырылды

Ошо көндәрҙә агрегат заводы клубында «Динамо» обществоһы шахматистәренең командаһы агрегатлылар шахматистәре менән осрашты. Был осрашыуға тиклем агрегат заводының шахматистәре «Большевик», «Труд» һәм «Буревестник» обществоларын еңеп, мөмкин булған 30 очконан 21 1/2 очко йыйнағайнылар.

Өфө беренселеге өсөн көрәш 40 таҡтала барҙы. Шахматисткалар Перевалова һәм Донцова иптәштәр уйынды беренсе булып тамамланылар. Уйын иптәш Перевалованың еңеүе менән бетте. Тәүге очконы агрегатлылар алдылар.

Беренсе категория шахматистәре Фролов һәм Бураков иптәштәр партияһы бөтәһенән дә оҙаҡҡа һуҙылды. 3 сәғәт буйына уйнағандан һуң динамосы Бураков бирелергә мәжбүр булды.

Ике команданың осрашыуы 8 1/2 : 1 1/2 иҫәбе менән завод шахматистәре файҙаһына тамамланды.

Еңеүселәргә тантаналы обстановкала Өфө ҡала физкультура һәм спорт Комитетенең хрусталь кубогы һәм почет грамотаһы тапшырылды.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Финляндияның түләнә торған репарацияларҙы кәметеү тураһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары

ХЕЛЬСИНКИ, 3 июнь. (ТАСС). Өс коммунист-министр — Лейно, Мурто һәм Янхунен 19 майҙа Финляндия хөкүмәтенә хат менән мөрәжәғәт иттеләр. Был хатта улар, Финляндияның политик хәленең ныҡлығын һәм Советтар Союзының уға ҡарата хуш ҡараштарын яҡшы иҫәпкә алып, Финляндия хөкүмәте Советтар Союзы хөкүмәтенә репарацияны кәметеү тураһында үтенес менән мөрәжәғәт итергә тейеш, тип белдерҙеләр.

Өс коммунист-министрҙең был белдереүе Финляндияның демократик кругтарында киң отклик тыуҙырҙы.

3 июнда Советтар Союзының Финляндиялағы посланнигы Г. М. Савоненков Премьер-министр Пеккала әфәнделә булды һәм уға Совет Хөкүмәтенең түбәндәге белдереүен еткерҙе:

«Финляндия хөкүмәте члендәре Лейно, Мурто һәм Янхунен әфәнделәрҙең Финляндия хөкүмәтенә Финляндияның репарация йөкләмәләрен еңеләйтеүҙе үтенеп СССР-ға мөрәжәғәт итергә тигән тәҡдим индергәнлектәре СССР-ҙың Финляндиялағы посланниге аша тапшырҙы. Совет Хөкүмәте иғтибарға алып, Совет посланнигенә белдерерҙе тәҡдимде ҡараған Финляндия хөкүмәте Лейно, Мурто һәм Янхунен әфәнделәрҙең тәҡдимен хуплаған.

Шул уңай менән СССР хөкүмәте Финляндияның түләнеп үтәргә тейешле репарация түләүҙәренең ҡалған суммаһын, ошо йылдың 1 июленән башлап, 50 процентҡа кәметте».

Премьер-министр Пеккала посланнигына Совет Хөкүмәтенең ҡарары Финляндия халҡы тарафынан тәрән рәхмәт тойғоһо менән ҡабул алынасаҡ, тип Мәскәүгә белдереүҙе һораны.

Италия хөкүмәтенең программ декларацияһы

РИМ, 2 июнь. (ТАСС). Кисә премьер-министр де Гаспери депутаттар палатаһында хөкүмәт декларацияһы менән сығыш яһаны. Декларацияла яҙылған реформаларҙы вәғәҙә итеү «эшселәрҙең, предприятиелар табышында ҡатнашыуы» һәм ер мөлкен помещиктар өсөн файҙалы булған ҡайҙа бүлеү һәм «ҡасабалар тураһында» тигән теләкте ярашлы булыуы тураһында белдереүгә ҡайтып ҡалды.

Де Гаспери эшселәрҙе «артыҡ сыуалыштарҙан һәм забастовкаларҙан» тыйылырға саҡырҙы һәм хөкүмәт тә шулай уҡ предприятие хужаларынан йәнәһе «ҡорбандар» талап итәсәк, тип әйтте. Де Гаспери, хөкүмәт забастовкаларҙы регламентлаштырыу тураһында закон сығарырға уйлай, тине. Лакин, тине де Гаспери, реформаларҙың ике шарт менән: бөтә партиялар государство авторитетен көүҙәләндереүсе христиан-демократтар партияһы ихтыярына буйһонған хәлдә, һәм илдең финанс хәле яҡшырған хәлдә генә тормошҡа ашырылыуы мөмкин, тине.

Хәҙергә иһә илдең финанс хәлен «нығытыу» маҡсатында налогтар арттырыласаҡ һәм «социаль маҡсаттарға» булған бөтә расходтар бөтөрөләсәк. Декларацияла төп ролде «сит ил капиталының инеүе» һәм Маршалл планы уйнарға тейеш, тип иҫкәртелә.

Де Гаспери асыҡтан-асыҡ «Американың экономик яҡтан тығылыуы теләккә ярашлы булып тора» тине һәм «ҡәнәғәтләнеү» менән Италияның экономикаһының уны тығыҙ бәйле Американың индустрияһы тигән һүҙ менән Америка кәмерегенең бойондороҡло булыуы турала был билдәләне.

«Американың башҡа беҙҙең экономикабыҙ йәшәй алмай», — тине де Гаспери. Ҡушма Штаттар алдында Италия «экономик нигеҙҙә промышленностың һәм ауыл хужалығының производствоһын үстерергә», тигән Американың ошо йөкләмәне алған йөкләмә уға шулай ук тормошҡа ашырылыуы «ҡаршылыҡтарҙы бөтөрөргә» тырыша. «Донъяның иң кәсле экономик системаһы менән дуҫлыҡта һәм ышаныс менән һорыуҙан мәнфәғәттәр» һәм Маршалл планы Италияның тышҡы политикаһын тотошо менән билдәләйҙәр. Был политиканың маҡсаттары түбәндәгеләр: Франция менән таможенный союз, ул ағымдағы йылдың октябренә «әҙер буласаҡ», Европаның экономик «хеҙмәттәшлеге», Трест тураһындағы мәсьәләне Бидо тәҡдимдәре рухында хәл итеү, ярашыу договорына фактик рәүештә ревизия яһау, Африка территориялары тураһындағы мәсьәләне хәл итеү.

Хөкүмәт лагере депутаттары АҠШ хөрмәтенә демонстрация яһанылар. Халыҡ демократик фронты вәкиле Гулло декларацияны һуң былай тине: «конституцияға ҡаршы характерҙа» булғанлыҡтан хөкүмәттең депутаттар палатаһы алдында белдереү менән сығыш яһарға хоҡуҡы юҡ ине. Лакин, белдереү яһалған икән, оппозиция фекер алышыуҙар барышында үҙенең ҡаршы килеүен белдерер.

Һуңыраҡ де Гаспери шундай уҡ белдереү менән сенатта сығыш яһаны.

Гәрәп ғәскәрҙәрендә немец һаллаттары

ВЕНА, 1 июнь. (ТАСС). «Абенд» газетаһының Мысырҙан хәбәрсеһе, Италияла алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, элекке немец офицерҙары һәм немец һаллаттарының тотош отрядтары Палестиналағы гәрәп ғәскәрҙәре составында хәрби хеҙмәттә тороп, Ливан армияһы 80 процент немецтәр... [illegible]

... «Африка корпусының» күп кенә офицерҙары ла ... [illegible]

Греция демократик хөкүмәтенең тәҡдимдәре тураһында Югославия телеграф агентствоһы

БЕЛГРАД, 2 июнь. (ТАСС). «Танюг» агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, «Азат Греция» радио станцияһы 1 июндә Греция халыҡ ваҡытлы демократик хөкүмәтенең белдереүен тапшырҙы. Унда былай тип әйтелә: ... [illegible] Грецияның милли суверенитеге һәм ... [illegible]

Был белдереү кабинеттың ... майҙа булған ... [illegible]

... монархист-фашистәрҙең үҫә барған ҡыйынлыҡтарға осрағанлыҡтарын Министрҙар совете иғтибарға алды. Илдең экономик хәле бик тиҙлек менән насарлана бара.

Демократик хөкүмәт: осһоҙ-саҡлы үткәрелгән монархист-фашистик һөжүмдәрҙең барыһы ла уңышһыҙлыҡҡа осраны һәм Румелдә 35 мең һалдат ҡатнашлығында монархистарҙың күптән көтөлгән булған киң һөжүме шулай уҡ емерелде. Демократик армияның эшмәкәрлеген киңәйтә һәм Пелопоннеста, Эпирҙа һәм башҡа провинцияларҙа бик яҡшы уңыштарға өлгәште. Азатлыҡ хәрәкәтенең халыҡ менән бәйләнеше һаман тәрәнәйә бара.

Әҫке хәлде һәм күптән түгел булып үткән халыҡ-ара ваҡиғаларҙы иҫәпкә алып, Грецияның ваҡытлы демократик хөкүмәте юғарыла әйтелгән белдереү менән сығыш яһарға ҡарар итте.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Специалист кәңәштәре

Бойҙай сәсеүлектәренә — өлгөлө тәрбиә

Яҙғы бойҙай — яҡшы тәрбиәләүҙе ярата, шунһыҙ унан юғары урожай алып булмай.

Яҡшы тәрбиә саралары, бөтәһенән элек, бойҙайҙың биологик үҙенсәлектәренә бәйләнгән. Яҙғы бойҙай зәғиф тамырланып үҫә торған культура. Уның 70—90 процент тамырҙар массаһы 0—20 сантиметр ҡатлам тупраҡта таралып үҫә. Бойҙайҙан яҡшы урожай алыу өсөн, ул быуын тамырҙарын яҡшы үҫешләндерергә тейеш. Быуын өсөн 0—10 сантиметр ҡатлам тупраҡта дым запасы етерлек булырға тейеш. Шунһыҙ быуын тамырҙары бөтөнләй барлыҡҡа килә алмайҙар һәм сыҡҡан өлөшө лә тулыһынса үҫә алмай. Тик төп тамырҙар иҫәбенә генә үҫкән бойҙай бер гектарҙан күп тигәндә 7—8 центнер урожай бирә.

Яҙғы бойҙай шытып сығып, быуынға һикереү фазаһында байтаҡ зәғиф үҫә. Был фазала күп кенә үҫемлектәр һирәгәйеүсән дә була. Был тәбиғи һирәгәйеү, күп кенә ваҡиғаларҙа, 15—20 процентҡа тиклем барып етә.

Бойҙайҙың иң яуаплы үҫеү фазалары булып уның шыта башлауҙан алып ҡыуаҡланыу аҙағына тиклем булған фазалары иҫәпләнә. Уның һуңғы фазаһында үҫемлек башаҡлана. Ошо фазаларҙа үҫеү шарттары яҡшы булғанда ғына бойҙай тулы ҡиммәтле, юғары урожай бирә алырлыҡ булып башаҡлана. Сәсеүлектәрҙе тәрбиә эштәрен ойоштороғанда бойҙайҙың был биологик үҙенсәлектәрен бик ныҡ иҫәпкә алып эш итергә кәрәк.

Быйыл тупраҡтың ныҡ ҡына ҡоро булыуы бойҙай сәсеүлектәрен тәрбиәләүҙә айырым талаптар ҡуя.

Бойҙай участкаларында ҡаты ҡатламды бөтөрөү — бойҙай сәсеүлеген тәрбиәләүҙә тәүге мөһим сара. Быйыл бигерәк тә һуңлап сәселгән участкаларҙа ямғырҙар ҡаты тупраҡ ҡатламын барлыҡҡа килтерҙеләр. Был ҡатламды зәғиф бойҙай шытымдары тишеп сыға алмайҙар. Сыҡҡан тиклемдәре, насар үҫешләнеү арҡаһында, бик тиҙ ҡороп һәләк булалар. Был ҡатлам барлыҡҡа килгән сәсеүлектең тупрағы ла бик ныҡ киба һәм уны ҡый үләндәре тиҙ баҫып ала. Был хәлдәрҙе булдырмау өсөн ҡаты тупраҡ ҡатламын бөтөрөргә кәрәк. Уны еңел тырмалар тешенә планкалар йәки бер ниса сыбыҡ ҡыҫтырып (тырма тештәре артыҡ тәрән батып йөрөмәһендәр өсөн) бер эҙҙән тырматыу аша йәки һырлы балдаҡ катоктары менән катоҡлау аша бөтөрөргә була.

Май айының ҡоро булыуы һәм ҡортҡостар эшмәкәрлегенең көсәйеүе арҡаһында быйыл бойҙай сәсеүлектәре һирәк күренәләр. Быйыл ҡый үләндәренең актив үҫа торған йәйә 2—3 йыл шыта алмай ятҡан ҡара һолоҙ ла быйыл 10—15 сантиметр тәрәнлектән шытып сығып үҫә башланы. Улар төрлө ҡортҡостарға үрсеүгә бик ныҡ ярҙам итәләр. Был шарттарҙа тупраҡтарҙы бер ... [illegible] тик бойҙай үҫемлегенә биреү бөгөнгө агротехниканың боевой бурысы булып тора. Быйыл өсөн быйыл бойҙай сәсеүлектәрен утауҙы ысын мәғәнәһе менән илгә булырлыҡ итеп ойошторорға кәрәк.

Бойҙай сәсеүлектәрен утау эшен улар шытып сығып һабаҡлана башлағанға тиклем алып барырға мөмкин. Ләкин шунан да һуңлап утау ярамай, ул сағында һынған йәш бойҙай һабағы яңынан баш күтәрә алмай, ҡороп. Бойҙай сәсеүлектәре өсөн иң яуыз ҡый үләндәре булып төрлө билсәндәр, ҡырлы ҡурай, әрем, һәтлә үлән, эт эсәге, бесәй ғарыһы, тыу тары, ҡаҡы, ҡымыҙлыҡ, ҡара һоло үләндәре иҫәпләнә. Уларҙың бер йыл ғына үҫә торған биотиптарен һабағын өҙөп утау ҙа етә. Ләкин һәтлә үлән, билсән кеүек ҡый үләндәрен мөмкин тиклем оҙон тамырҙары менән һыуырып алырға кәрәк. Шулай булмағанда, ерҙә ҡалған тамырҙарҙан яңынан бик тиҙ һабаҡтар үҫеп сығасаҡ.

Ҡара һоло быйыл бик көслө үҫә. Байтаҡ мәшәҡәтле эш булыуға ҡарамаҫтан, уны утарға һәм бөтөрөргә кәрәк.

Юғары урожай мастерҙары яҙғы бойҙай сәсеүлегенә өҫтәмә азыҡландырыу эшен иң яуаплы һәм кәрәкле тәрбиә сараһы итеп ҡарайҙар. Ул шулай булырға тейеш тә. Тәүге үҫеү фазаларында зәғиф бойҙай үҫемлектәре өҫтәмә азыҡтарға мохтаж булалар. Бындай азыҡтар төрлө минераль һәм ... [illegible] ... кә, тупраҡ-климат шарттарына, сәсеүлектең торошона ҡарап минераль ашламалар өҫтәмә азыҡландырыу өсөн түбәндәгесә ҡулланыла: азотлы ашламалар бер гектарға 1,5—2,5 центнер, суперфосфат 1,5—3 һәм 4 центнерға тиклем, калий тоҙо 0,75—1,5 центнер. Бөтә төр минераль ашламаларҙы ла башта бик яҡшы ваҡларға, иләргә кәрәк. Индергән саҡта ел осормаһын өсөн уларҙы дымлы тупраҡ менән ҡатнаштырыу яҡшы була. Минераль ашламаларҙы ямғырҙар алдынан таратып сығыу файҙалы. Өҫтәмә азыҡландырыуҙың нормалары байтаҡ ҙур булғанда, уларҙы икегә бүлеп индереү яҡшыраҡ: беренсе яртыһын бойҙай тулыһынса шытҡас йәки ҡыуаҡланыу осоронда һәм икенсе яртыһын — һабаҡлана башлау осоронда.

Быйылғы шарттарҙа өҫтәмә азыҡландырыу өсөн минераль ашламаларҙы һыуҙа иретеп ҡулланыу файҙалыраҡ булыр. Быны өсөн уларҙы 5—10 өлөш һыуҙа иретеп ялғашлы миҫкәләр аша ағыҙып таратырға була.

Тиреҫ серетмәһен дә файҙаланырға мөмкин. Ләкин был ашлама (бер гектарға 40—50 йөк иҫәбенән) бойҙай шытып сыҡҡансы йәки шытып сығыу алдынан ғына таратылырға тейеш. Шунан да һуңлап индереү файҙаһыҙ. Ҡош тиҙәге бер гектарға 5—6 центнер самаһы индерелә. Уны ямғырлы көндә шытымдар өҫтөнә таратып сығырға кәрәк. Көл бер гектарға 3—5 центнер самаһы ҡулланыла.

В. Ғирфанов, Башҡортостан баш тәжрибә станцияһының агротехника бүлеге мөдире.

СССР Госпланының Үҙәк статистика управлениеһының
Өфө ҡалаһындағы статистика техникумы
1-се, 2-се, 3-сө курстарға
УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ.

Техникум СССР-ҙың Госплан системаһында эшләү өсөн статистика работниктәре әҙерләй.

Беренсе курсҡа 7—8-се кластарҙы, икенсе курсҡа 10-сы класты, өсөнсө, уҡыу срогы тиҙләтелгән, курсҡа 10-сы класты бөтөрөп, өлгөргәнлек аттестаты алған кешеләр ҡабул ителәләр.

Уҡырға инеүселәр түбәндәге предметтарҙан экзамен бирәләр: СССР Конституцияһынан, рус теленән, математиканан.

Тулы булмаған урта мәктәптәрҙе отличнога һәм урта мәктәптәрҙе 1947 йәки 1948 йылдарҙа тамамлаусылар һынауһыҙ алыналар.

Уҡырға инеү өсөн ғаризалар 1948 йылдың 10 августына тиклем ҡабул ителәләр. Ғаризаға түбәндәге документтар беркетелергә тейеш: белеме тураһында танытма, тыуыуы тураһында белешмә, автобиография, өс фотокарточка, һаулығы тураһында танытма.

Ҡабул итеү өсөн һынауҙар 15 августан 25 августҡа тиклем дауам итә.

Уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Техникумға уҡырға алынған кешеләр, дөйөм ниғеҙҙә, стипендия менән тәьмин ителәләр.

Райондарҙан килгән уҡыусылар торлаҡ менән тәьмин ителәләр.

Ғаризаны түбәндәге адрес буйынса ебәрергә: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, йорт номеры 100. Өфө Статистика техникумы директорына. Телефон номерҙары: 2-81-07 йәки 2-75-11.

Дирекция.

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-72-26.

П 00162 Өфө газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттары, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 112
6
июнь
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Генералиссимус Сталинга Фин хөкүмәтенең хаты. (1-се бит).
Сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләргә! (1-се бит).
В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулды. (1-се бит).
Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдерәйек! (2-се бит).
А. Веретенников, Леткер. — Сәсеүлектәрҙе ауыл хужалығы ҡорткостарынан нығыҡ һаҡларға. (2-се бит).
И. Репин. — Предприятиеләрҙә партия контроле. (2-се бит).
Бөйөк революцион демократ. В. Г. Белинский Ватан тураһында. В. Г. Белинский тураһында В. И. Ленин. **Ғәйнан Әмири.** — Бөйөк традициялар. **В. Кирпотин.** — В. Г. Белинский (3-сө бит).
Ә. Бикчәнтәев. — «Рядовой Александр Матросов». (4-се бит).
БӘЛӘКӘЙ ФЕЛЬЕТОН. Ғ. Ш. Дәүләкәндә таш юҡ... (4-се бит).
Халыҡ-ара күҙәтеү. (4-се бит).
Совет-Финляндия договорын ратификациялау айҡанлы Хельсинкиҙа митинг. (4-се бит).

Йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәйек!

Республикабыҙҙың бөтә промышленность предприятиеләре, төҙөлеш, тимер юл, һыу юлы транспорты работниктарының коллективтары биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн ярышалар. Уларҙың күптәре үҙҙәренең биш йыллыҡ заданиеларын тағы ла ҡыҫҡараҡ сроктарҙа — өс ярым йылда тамамлау бурысын ҡуйҙылар. Был ярышта 1948 йыл — хәл иткес йыл булып тора. Һәр бер коллектив йыл башынан уҡ үҙ йөкләмәләрен үтәү, рентабелле эшләү юнәлешендә эске мөмкинлектәрен иҫәпләүҙе, ойоштороу-техник саралар планын эшләне. Билдәләнгән сараларҙы тормошҡа ашырыу, ярыш йөкләмәләрен үтәү өсөн большевистик көрәш күп коллективтарға гүзәл еңеүҙәр килтерҙе.

Беҙҙең быйылғы эшебеҙ биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн нығыҡ нигеҙ һалырға тейеш. Күп коллективтар был бурысты аңлайҙар. Шуның өсөн дә улар өлгәшелгәндәр менән тынысланмайҙар, ә ярышты тағы ла көсләрәк йәйелдерәләр. Хәҙер йыллыҡ планды Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығына үтәү өсөн социалистик ярыш киң ҡолас ала бара.

Байрамды лайыҡлы ҡаршылайыҡ! Октябрьск нефтселәре, Белорет металлургтары шулай тиҙәр. Төҙөлеш-монтаж конторалары, прокат цехы коллективтарының инициативаһы менән башланған байрам алды ярышы хәҙер бөтә нефтселәрҙе, металлургтарҙы солғап ала бара. Юғары наградаһы аҡларлыҡ темп менән эшләгән Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы ла байрамды хеҙмәттә яңы еңеүҙәр менән билдәләргә булды. Ишембай нефть эшкәртеүселәренең аҙымы ла еңеүгә ышаныслы.

Алдынғыларҙың инициативаһы гүзәл. Улар ваҡыт көтмәгәнлеген аңлайҙар. Беҙ йыл ярымда ике ярым йыллыҡ эште башҡарырға тейешбеҙ. Ә Бөйөк Октябрь тантанаһына биш ай самаһы ғына ваҡыт ҡалды. Тимәк, хәҙер һәр бер көн ҡиммәт. Массаның инициативаһы, теләге, ынтылышы ваҡытты ҡәҙерләй белеүгә, һәр көндө тулы, етештереүсәнлекле файҙаланыуға йүнәлтелгән. Был теләкте ерҙә еткереү өсөн нимә талап ителә һуң?

Иң мөһиме — масса инициативаһының башында торорға, байрам хөрмәтенә арналған ярыш менән бөтә коллективтарҙы солғап алырға кәрәк. Сайҡалыуҙарға, шау-шыуға, штурмовщинаға һис юл ҡуйырға ярамай. Ярышта тигеҙ ритм менән эшләргә, йөкләмәне ай һайын, көн һайын, һәр бер цех, участка, бригада буйынса, продукцияның һан, сифат, ассортимент күрһәткестәре буйынса үтәргә, хеҙмәт етештереүсәнлеген өҙлөкһөҙ күтәрергә кәрәк. План, йөкләмә — миллионлаған йәнле кешеләр, уларҙың еңеүгә булған ихтыяры ул. Уларҙың һәр береһе дөйөм эшкә үҙ вкладын индерә. Ә һәр бер эшсе үҙенең хеҙмәт вкладын иң тиклем күберәк индерә, республикабыҙҙың промышленносе үҙ алдына ҡуйылған бурысты шул тиклем тиҙерәк үтәйәсәк.

Беҙҙең эшселәребеҙ араһында бер йылда ике-өс йыллыҡ һәм унан да күберәк норма үтәүселәр һанала. Ундай хеҙмәт батырҙарын һәр яҡлап хөрмәтләргә, уларҙың тәжрибәһен киң таратырға кәрәк. Ләкин нормаларҙы үтәп еткермәүселәр ҙә күп әле. Бигерәк тә улар бораулаусылар араһында күп. Металлургия, машина, станоктар төҙөү, урман промышленносендә, төҙөлеш тресттарында ла нормаларҙы үтәмәүселәр аҙ түгел. Күп кенә эшселәрҙә сырьё, материаль, яғыулыҡ, электр энергияһы һәм инструменттә файҙаланыуҙа еңел ҡараш йәшәп килә. Бында эшселәр ҙә, етәкселәр ҙә ғәйепле. Бер үк шарттарҙа күп эшселәр яҡшы эш күрһәткестәре биргәндә йәки тотош предприятие өлгөлө эшләгәндә, байтаҡ эшселәрҙең нормаларҙы үтәмәүен, экономияһыҙ эшләүен йәки айырым предприятиеләрҙең артта ҡалыуын эшселәрҙең һәм етәкселәрҙең ғәйебе менән генә аңлатырға мөмкин. Үҙ һөнәрендә өҙлөкһөҙ камилләштереү. Йөкмәтелгән бурысты намыҫ менән үтәү, экономиялы эшләү һәр бер эшсенең, етәксенең Тыуған ил алдындағы почетлы бурысы ул. Совет эшсеһе шул бурыс юғарылығында булырға, ә етәксе уға эш шарттары тыуҙырырға, эшлекле ярҙам күрһәтеүсән, талапсан булырға, артта ҡалыусыларҙы алдынғылар кимәленә күтәрергә тейеш. Социалистик ярыш шуны талап итә.

Хеҙмәтте аныҡ ойоштороу — йөкләмәләрҙең уңышлы үтәлеүен хәл итә торған мөһим сараларҙың береһе. Предприятиенең производство-техник планы бөтә коллективҡа еткерелергә, заданиелар цехҡа, участкаға, бригадаға ғына түгел, бәлки һәр бер эшсегә билдәле булырға тейеш. Техник яҡтан нигеҙләнгән эш нормаларының, механизм, сырьё, материалдарҙың, яғыулыҡ һәм электр энергияһын файҙаланыу нормаларының булыуы, уларҙы һәр бер эшсенең белеүе шарт. Кешеләр үҙҙәренең нәмә, күпме эшләргә икәнлектәрен яҡшы белһәләр, ул кешеләрҙә яуаплылыҡты күтәрә, инициатива уята, стахановсы хеҙмәткә рухландыра. Ә ярышыусылар өсөн был бик кәрәк сифат.

Бер урында ятып ҡалыу, яңылыҡҡа ҡарата консерватизм беҙҙең алға барыуыбыҙға ныҡ ҡамасаулай. Социалистик ярыш яңы техниканы, механизацияны киңәйтеү индереүҙе, алдынғы тәжрибәләрҙе киң ҡулланыуҙы талап итә. Ә беҙ техникаға, гүзәл тәжрибәләргә бай. Был йүнәлештә бигерәк тә беҙҙең инженер-техник работниктәребеҙ большевистик эшлеклелек күрһәтергә бурыслылар.

Халыҡ хужалығының хәл иткес тармаҡтары — нефть, металлургия, машиналар төҙөү, күмер промышленносенең, төҙөлештең яҡшы эшләүенә өлгәшеү бөтә илебеҙҙең иғтибар үҙәгендә тора. Октябрь алды ярышында нефтселәр разведка, бораулау эше темпын күтәреүгә, Белорет, Баймаҡ металлургтары беренсе кварталдағы өҙөклектәрҙе ҡаплауға, машина төҙөүселәр производство технологияһын яҡшыртыуға, төҙөүселәр тиҙ һәм яҡшы итеп төҙөүгә бөтә көстәрен туплаярға тейештәр. Ә Көньяғынҙа күмерен юл һалыу ярышта бөтә Башҡортостандың намыҫ эше булып тора.

Бөтә көс, бөтә резерв йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәүгә! Байрам алды ярышы шул лозунг аҫтында йәйелдерелә, хәл иткес йыл программаһын шул көнгә үтәүгә тейешле хужалыҡ етәкселәре һәм эшселәр, партия, комсомол һәм профсоюз ойошмаларының да иң мауыплы бурысы ул.

Генералиссимус Сталинга Фин хөкүмәтенең хаты

ХЕЛЬСИНКИ, 4 июнь. (ТАСС). 4 июнь Премьер-Министр Мауно Пеккала һәм фин ил эштәре министры Карл Энкель Советтар Союзының Финляндиялағы посланнигы Г. М. Савоненковҡа булдылар һәм уға, Генералиссимус Сталинга тапшырыу өсөн, шул хатты бирҙеләр: Хельсинки, 4 июнь 1948 йыл.

ССР Союзы Министрҙар Советы Председателе Генералиссимус И. В. Сталин әфәндегә.

Генералиссимус әфәнде.

Совет Социалистик республикалар Союзы ғәрәтенә тыш һәм тулы ҡоҡуҡлы посланнигының репарация түләүҙәренең ҡалған суммаһын, ошо йылдың 1 июненән башлап, 50 процентҡа кәметеү турында Совет Хөкүмәтенең кин күңеллелек һәм йомарт рәүештә ҡарар иткәнлеге тураһында белдереүе Фин халыҡтарының йөрәктәренә шатлыҡ һәм тәрән рәхмәт тойғоһо тыуҙырҙы.

Генералиссимус әфәнде, Финляндияға ҡарата беҙҙең һәм һеҙ етәкселек иткән Совет Хөкүмәте тарафынан күрһәтелгән яҡшы мөнәсәбәт, шулай уҡ һәм дуҫлыҡтың был яңы дәлилдәре өсөн Фин хөкүмәте исеменән тәрән рәхмәт тойғоһо ҡабул итеүегеҙҙе һорайым. Һуңғы ваҡытта сервез хәстәрлек талап иткән Финляндияның экономик хәле ренарация йөкләмәләренең кәметеүе арҡаһында еңеләйәсәк икәнлеге шикһеҙ.

Генералиссимус әфәнде, Һеҙҙән минең һеҙгә булған тәрән хөрмәт белдереүемде шатланып ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Министрҙар Советы
Председателе
МАУНО ПЕККАЛА.

СӘСЕҮЛЕКТӘРҘЕ ЯҠШЫ ТӘРБИӘЛӘРГӘ!

Бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү планы арттырып үтәлде

БЕЛОРЕТ. (Телефон аша). Районның колхоздары бөртөклө ашлыҡ культуралары сәсеү планын арттырып үтәнеләр.

Районда 17 колхоздың 13-ө йыл башы эштәрен тулыһынса тамамланы. «Красный Урал», «Буғанаҡ» һәм Точинский исемендәге колхоздар сәсеүҙе иң яҡшы срокта яҡшы сифатлы итеп үткәрҙеләр.

Һуңғы гектарҙар сәселә

ПОКРОВКА. (Телефон аша). Районның колхоздары сәсеү планын тулыһынса үтәү өсөн хәҙер һуңғы гектарҙарҙы сәсәләр. 3 июнгә план буйынса 12 мең 350 гектар урынына, 12 мең 250 гектар майҙанда ашлыҡ сәселде.

60 колхоздың 45-е сәсеүҙе тулыһынса тамамланы. Кагановиц исемендәге колхоз сәсеү планын 104, Суворов исемендәге колхоз 108 процентҡа үтәнеләр. Ҡалған колхоздар ҙа сәсеүҙе тамамлау алдындалар.

Бөтә колхоздарҙа ла пар һөрөү һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәре бара. 1100 гектар майҙанда пар һөрелде.

Звенолар утауҙа

ПЕТРОВСК. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). «Ҡыҙыл таң» колхозы районда беренсе булып сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартырға башланы. Звенолар дүрт көн эсендә 20 гектар бойҙай, 24 гектар кенбыҙыш сәсеүлектәрен ҡый үләндәренән утанылар. Мулланиҙина, Хөснөнова иптәштәр звено члендары көндәлек эш нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр.

Был колхоз менән ярышыусы «Тратау» колхозы члендары ла 29 майҙа утауға төштөләр. Улар икенсе көн эсендә 51 гектар арпа һәм бойҙай сәсеүлектәрен ҡый үләндәренән таҙарттылар. Звенолар иң тәү ҡый үләндәре күберәк үҫкән участкаларҙы һайлап утайҙар. Был эштә алдынғы колхозсылардан Сафура Муллаяулова, Мәдинә Рәшитова, Таһминә Степанова иптәштәр стахановсы эш өлгөләре күрһәтәләр. Улар 0,20 гектар урынына, көн һайын 0,30-ар гектар майҙанды ҡый үләндәренән таҙарталар.

«Восток», Сталин исемендәге колхоздар ҙа утауға ойошҡан рәүештә башланылар.

Ғ. Котлобаев.

Хәйбулла районында пар һөрмәйҙәр

Хәйбулла районы колхоздары үҙҙән йыл пар һөрөүгә яҙғы сәсеү эштәре бөткәс кенә башлау һәләтләндә, ә был иһә сәсеүҙә ҡатнашҡан тракторҙарҙың пар һөрөүгә күсерелеүе һуҙылыуға килтерҙе. Шуның һөҙөмтәһендә күпселек колхоздарҙа алдағы йылдың уңышы юғалтыу хәүефе тыуҙы.

Район ауыл хужалығы бүлеге, МТС һәм колхоз етәкселәре быйыл был хаталарҙы ҡабатламау, пар һөрөүҙе иртә срокта, яҡшы сифатлы итеп үткәреү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр ине. Ләкин быйыл да эш былтырғы кеүек бара. Пар һөрөү срогы үтеп киләүгә ҡарамаҫтан, райондағы 44 колхоздың береһе лә был эшкә башламаған.

Быйыл бөтәһе 8500 гектар пар ере эшкәртелергә, шуның 4000 гектары Хәйбулла МТС-ы тракторҙары менән һөрөләргә тейеш. Был МТС-та ошо көнгә тиклем бер генә трактор ҙа пар күтәреүгә ҡушылмаған.

Сәсеүҙе тиҙерәк тамамлау һәм бер үк ваҡытта пар һөрөү эштәрен дә киң йәйелдереү өсөн тракторҙар пар һөрөүгә күсерелергә тейеш. Хәҙер колхоздарҙың сәсеүҙе тамамлаған тракторҙары пар һөрөү ойошторолорға. «Яңы юл» колхозында МТС-тың ике тракторы бар. Уларҙың тик береһе генә эшләй, ә икенсе тракторы ултыра. Тракторсылар ҙа, МТС етәкселәре лә «был тракторҙарҙы иҫкергән» тиҙәр, тик уларҙы тиҙерәк ремонтлау тураһында уйлап ҡарамайҙар. Сталин һәм Фрунзе исемендәге колхоздарҙа ла тракторҙар пар һөрөүгә ҡушылмаған. Ә был колхоздар «Киң тугай», «Новая жизнь», Стаханов һәм Чапаев исемендәге колхоздарҙа быйыл 10—15 көн эсендә үк иҫке тракторҙар пар һөрөү эшенә ҡушыла алыр ине. Был эшкә ҡушырға мөмкин ине. Ләкин улар әле булһа пар һөрөү эшенә башламағандар. Район ауыл хужалығы бүлеге ла (мөдире иптәш Шапошников) был колхоз етәкселәренән пар һөрөү графигенең үтәлеүен талап итмәй.

Р. Шәфиҡова.

Пар һөрөү планын срогынан алда үтәү өсөн

Балтач районы Куйбышев исемендәге колхоз һабансылары араһында пар һөрөү планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярыш киң йәйелдерелде.

Һабансыларҙан Яхъя Яҡупов, Ҡасим Хәмәтьяров иптәштәр 0,80 гектар урынына, берәр гектар ер һөрәләр. Садри Борһанов, Даян Сафин иптәштәр ҙә улар өлгөһендә эшләп, көндәлек нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр. 1 июнгә колхоз 260 гектар майҙанда ер һөрөп, планды 90 процентҡа үтәне. 5 июнгә пар һөрөү тулыһынса тамамланасаҡ.

6 июнда колхозда бөтә халыҡ байрамы — һабантуйы үткәреләсәк. Унда сәсеүҙә һәм пар һөрөүҙә алдынғылыҡты алған колхозсылар колхоз правлениеһы тарафынан бүләкләнәсәктәр.

Х. Яҡупов.

Ярышып эшләйҙәр

Колхозыбыҙҙа игенселек буйынса 6, йәшелсәлек буйынса бер даими звено эшләй. Уларҙың бөтәһенә лә инвентарҙар, тартыу көстәре һәм ер участкалары беркетелгән. Звенолар яҙғы сәсеүҙе ойошҡан рәүештә үткәрҙеләр. 25 майға сәсеү тамамланды.

Хәҙер бөтә звенолар пар күтәреү эшенә башланылар. Бында ла социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Нормалар көн һайын арттырылып үтәлә. Шул уҡ ваҡытта улар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшен дә алып баралар.

Беҙ быйыл арыштың һәр бер гектарынан 20-шәр, бойҙайҙан 18-әр центнер урожай алыу өсөн көрәшәбеҙ.

Ғ. Собханғолов,

Ғафури районы «Ҡыҙыл Егәт» колхозы председателе.

Утауҙа нормаларҙы арттырып үтәйҙәр

«Урал» колхозының (Бөҙәйәк районы) алдынғы звенолары утау эшенә тотондолар. Утауҙа звенолар һәм звено члендары индивидуаль һәм группалы сдельщина нигеҙендә ярышып эшләйҙәр. Көндәлек нормаларҙы арттырып үтәү өсөн ойошторолған был социалистик ярышта Иҫәнғолова һәм Мәжитова иптәштәрҙең звенолары алда баралар.

В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулды

Башҡортостанда Белинский көндәре

Өфө

ӨФӨ. Ҡаланың бөтә общественносе бөйөк рус тәнҡитсеһе, революцион демократ В. Г. Белинскийҙең иҫтәлек көндәрен лайыҡлы билдәләүгә айҙар буйына әҙерләнде. Предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә һәм уҡыу йорттарында уның тормошона һәм ижадына арналған йыйылыштар уҙғарылды.

3 июнда Башҡорт государство филармонияһы бинаһында политик һәм ғилми белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз Обществоһының Башҡортостан бүлеге, Башҡортостан Совет Яҙыусылары Союзы, М. Ғафури исемендәге ғилми-тикшеренеү институты һәм Ғалимдар Йортоноң башҡала хеҙмәтсәндәре ҡатнашлығында бөйөк демократ В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу айҡанлы тантаналы ултырыш булып үтте.

«Белинский һәм бөйөк рус әҙәбиәте» тигән темаға доклад тыңланды. Докладты политик һәм ғилми белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз Обществоһының действительный члены, педагогия институтының доценты иптәш М. Ғ. Пиҙов яһаны.

Ултырыштан һуң Белинский йәшәгән дәүерҙәге рус классиктарының әҫәрҙәренән торған концерт бирелде.

7 июнда БАССР Министрҙар Советы Залында партия, совет, профсоюз, комсомол һәм башҡа ойошмалар вәкилдәренең дөйөм ҡала йыйылышы буласаҡ.

Черниковск

ЧЕРНИКОВСК. Ҡаланың бөтә предприятиеләрендә, учреждениеләрендә һәм мәктәптәрендә бөйөк рус тәнҡитсеһе, революцион-демократ В. Г. Белинскийҙең тормошо һәм ижады тураһында беседалар һәм докладтар үткәрелә. Машиналар төҙөү заводының һәр бер цехында агитаторҙар эшселәрҙе бөйөк ижадсының эшмәкәрлеге менән таныштыралар.

Бөгөн «Ударник» клубында художестволы әҙәбиәт уҡыусыларҙың кисәһе була. Бында беренсе номерле ҡыҙҙар мәктәбе уҡытыусыһы О. Алабужева В. Г. Белинскийҙең тормошо һәм ижады тураһында доклад яһаясаҡ. Клубта бөйөк тәнҡитсегә арналған күргәҙмә ойошторолдо. Унда Ленин һәм Сталиндең Белинский тураһында әйткән һүҙҙәре, тәнҡитсенең ижадын күрһәтеүсе китаптар, һүрәттәр урынлаштырылған.

Ошо көндәрҙә ҡала активының В. Г. Белинский иҫтәлегенә арналған дөйөм йыйылышы буласаҡ.

Ишембай

ИШЕМБАЙ. (Телефон аша). 8 июнда ҡаланың партия, совет һәм башҡа ойошмаларының В. Г. Белинскийға арналған йыйылышы буласаҡ. Унда бөйөк рус тәнҡитсеһе, революцион-демократтың тормошо һәм ижады тураһында ВКП(б) ҡала комитетының кадрҙар буйынса секретары иптәш Хәмитованың докладыы һәм ҙур концерт буласаҡ.

В. Г. Белинский тураһында агитаторҙар өсөн семинар үткәрелде, улар хәҙер бөйөк тәнҡитсенең тормошо һәм ижады менән нефтселәрҙе таныштыралар. Ошо көндәрҙә ҡала интеллигенцияһы өсөн «Бөйөк тәнҡитсе һәм философ» тигән лекция буласаҡ.

Предприятиеләрҙә, учреждениеләрҙә һәм мәктәптәрҙәге стена газеталарының һуңғы номеры В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыуға арнала. Библиотекала фотокүргәҙмә ойошторолдо. Урындағы радиоузел аша «В. Г. Белинский» тигән беседа бирелде.

Стәрлетамаҡ

СТӘРЛЕТАМАҠ. (Телефон аша). Бөйөк рус тәнҡитсеһе В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу көнө ҡалала ҙур әҙерлек менән ҡаршыланды. Мәктәптәрҙә, учреждениеләрҙә, уҡытыусылар институтында был айҡанлы йыйылыштар һәм беседалар үткәрелде. Бөйөк революцион-демократтың ижады һәм тормошо стена газеталарында яҡтыртылды. Парткабинет һәм библиотекала уға арналған күргәҙмәләр ойошторолдо.

Уҡытыусылар институтының әҙәбиәт кафедраһы етәксеһе иптәш Диларова докладыы менән хеҙмәтсәндәрҙең дөйөм ҡала йыйылышы буласаҡ.

Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығы хөрмәтенә социалистик ярышты киң йәйелдерәйек!

Яңы йөкләмәләр алалар

Октябрьск нефть ҡалаһының предприятиеларе араһында Октябрь алды социалистик ярышы әлеһән-әле киң ҡолас ала бара. Ленин орденле «Туймазынефть» тресының торлаҡ төҙөләшә конторағы коллективе ҡалала был ярыштың инициаторы булып тора һәм ул предприятиеләр араһында алдынғы урындарҙың беренеһен ала.

Конторағың коллективе алты айлыҡ программаны 1 июнгә үтәп, нефтселәр өсөн 1200 квадрат метр яңы торлаҡ майҙаны төҙөп тапшырҙы.

Торлаҡ төҙөүселәр Октябрь алды социалистик ярышына ҡушылып, йыллыҡ планды 7 ноябргә тамамларға һәм йыл аҙағына тиклем пландан тыш 1000 квадрат метр яңы торлаҡ майҙаны төҙөп тапшырырға йөкләмә алдылар.

1-се номерле нефть промыселе коллективе үҙенең йөкләмәһен ҡайтанан ҡарап сыҡты. Нефть сығарыуҙың йыллыҡ планын срогынан алда үтәүҙе тәьмин итеү сараларын билдәләне.

Был промыселдең коллективе «Туймазынефть» тресы күләмендә үҙенең биш айлыҡ планын беренсе булып 28 майға тамамланы һәм 1 июнгә пландан тыш йыллыҡ йөкләмәһенең яртыһы самаһын бирҙе.

Икенсе промысел һәм төҙәләш-монтаж конторағы коллективтәре лә биш айлыҡ производство планын срогынан алда тамамланылар һәм яңы күтәренке йөкләмәләр алдылар.

И. Болдогоев.

Ярты йыллыҡ план үтәлде

Өфөләге күн заводы (директоры иптәш Гордон) алты айлыҡ программаны 112 процентҡа үтәне. Үткән йылдағы ошо ваҡытҡа сағыштырғанда, 38,2 процентҡа артыҡ продукция эшләп сығарылды.

Начальниктәре Горшунов һәм Вахитов иптәштәр булған цехтар ярышта алдынғылыҡ күрһәтәләр. Был цехтар продукция етештереүҙе ике тапҡырға арттырҙылар.

Апрель айында завод цех һәм дөйөм завод расходтарын кәметеү, сырье һәм ягыулыҡ материалын рациональ файҙаланыу арҡаһында 120 мең һум экономия яһаны.

Завод коллективе йыллыҡ планды Октябрҙең 31 йыллығына тамамлауға конкрет йөкләмә алды.

Коллективтең ныҡышмалы хеҙмәте

«Автотрактородеталь» заводы коллективе үҙенең биш йыллыҡ планын срогынан бер йылға элек, ә 1948 йыл планын Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығы көнөнә үтәү бурысын ҡуйҙы.

Коллективтең ижади һәм физик хеҙмәте, заводтың эске мөмкинлектәре ошо бурысты үтәүгә тупланған. Цехтар, бригадалар социалистик ярышта алған йөкләмәләрен үтәү өсөн арымай-талмай эшләйҙәр.

Ныҡышмалы хеҙмәт үҙенең һөҙөмтәләрен бирә. Хәл иткес йылдың дүрт айы планын арттырып үтәгән коллектив май айында тағы ла яҡшыраҡ күрһәткестәр бирҙе. Айлыҡ программаны валовой продукция буйынса 117, ә тауар продукцияһы буйынса 123 процентҡа үтәүебеҙ шул турала һөйләй.

Социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәү өсөн көрәштә Пьянзин, Андронов иптәштәр етәкселек иткән беренсе һәм икенсе цехтарҙың коллективтәре айырыуса өлгө күрһәттеләр. Был цехтарҙа производство пландары үтәлешенең күрһәткестәре дөйөм завод күрһәткестәренә ҡарағанда күп юғары. Цехтарҙа һәр бригаданың ярыш договоры, һәр эшсенең индивидуаль йөкләмәһе бар. Бригадаларҙың, айырым эшселәрҙең эш күрһәткестәре цехтарҙағы ярыш таҡталарына көн һайын яҙып барыла. Был ярыш йөкләмәләре үтәлешен тикшереүҙең бер формаһы булып тора. Смена һайын бер ярым, ике норма биреүсе Хлесткин, Белякова, Немкова кеүек тиҫтәләгән эшселәр ярыш йөкләмәләрен үтәү өсөн көрәшеп, заводтың маҡтаулы стахановсылары булып әүерелделәр.

Производство планын срогынан алда үтәү өсөн көрәш—заводтың рентабеллегә өсөн көрәш менән тығыҙ бәйләп алып барыла. Был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн беҙ ойоштороу-техник саралар планында ҡаралған күп кенә эштәрҙе тормошҡа ашырҙыҡ. Һөҙөмтәлә завод йыл башында планлаштырылған государство дотацияһын алмаҫҡа булды һәм 4 ай эсендә 818 мең һум файҙа бирҙе.

Тейешле сырье менән ваҡытында тәьмин ителгәндә беҙҙең производство уңыштарыбыҙ тағы ла ҙурыраҡ булыр ине. Ләкин Ҡорос-сыбыҡ заводы (директоры иптәш Нодельман) беҙҙе тейешле ассортименттағе ҡорос-сыбыҡтар менән ваҡытында тәьмин итмәй. Шуның арҡаһында тракторҙар өсөн ҡайһы бер запас частар планын үтәү юғары кимәлдә түгел әле. Ҡорос-сыбыҡ заводы етәкселәре беҙҙең эшебеҙгә тотҡарлыҡ яһауҙарын бөтөрөрҙәр, тип уйлайбыҙ. Беҙ йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәүҙе тәьмин итәсәкбеҙ.

Ф. Гулин,

«Автотракгородеталь» заводы директоры

Завод ходка ебәрелде

Ошо йылдың май айында Ильинка прискаһының (Учалы районы) эфиль заводы эксплоатацияға тапшырылды. Завод быйылғы сезонда мендәрсә тонна руда эшкәртергә тейеш. Коллектив планды биш айға тамамлауға йөкләмә алды. Эшселәр үҙ-ара ярышты киң йәйелдереү нигеҙендә һигеҙ сәғәтлек норманы смена һайын дүрт сәғәттә [illegible]. Уларҙың эштәре бөтә прииск коллективе өсөн дә өлгө булып тора.

Н. Якупова.

ЯҢЫ КИТАПТАР

Ошо арала Башгосиздат түбәндәге китаптарҙы баҫып сығарҙы:

Лоҡман Хәким (Ғиләжев), «Йәшен уттары», шиғырҙар. Тиражы 4.000 хаҡы 1 һум 50 тин.

«Мәскәү биргән еңеү салютында
Һәм тосында ошо кешенең.
Яңғырап торҙо, үлмәҫ дан йырылай,
Ошо ябай пушкарь исеме..»

Пәш шағир Ғиләжевтең һуғыштан ҡайтҡас, 1946 йылда яҙған «Пушкарь Мөхтәр» тигән шиғырынан килтерелгән был юлдар, бер тиклем дәрәжәлә, уның был—беренсе йыйынтығына тупланған бөтә шиғырҙарына характерле булып торалар. Йыйынтыҡтың төп геройы — ябай һалдат — «минометчик Сәлихов», «Уфимский егет», «минер Нурбаяң», «ябай санитаркалар». Улар Ватанға, бөйөк Сталинға булған сикһеҙ мөхәббәт һаҡлайҙар, бөтә ауырлыҡтарға ҡаршы барып, уларҙы еңеп сығалар һәм, аҙаҡ килеп, дошманды тар-мар итеп ҡайтҡас та, «Әле лә мин һалдат, иптәштәр!», тип фронттағы дәрт менән илде аяҡҡа баҫтырыу эшенә тотоналар.

Авторҙың беренсе аҙымы булһа ла, йыйынтыҡта өлгөргән, байтаҡ художество юғарылығына эйә булған, төрлө хисле шиғырҙар бар.

* * *

С. Михалков «Ҡыҙыл галстук», пьеса. Ә. Ихсан тәржемәһе. Тиражы 5.000, Хаҡы 2 һум.

Сталин премияһы лауреаты Сергей Михалковтың был пьесаһы пионерҙар араһындағы тәрбиә мәсьәләләренә, Тыуған илгә, иптәштәренә һәм ата-әсәгә тоғролоҡ һәм дуҫлыҡ темаһына арналған.

Советтар Союзының бөйөк байрағының бер өлөшө булған ҡыҙыл галстук — Ватанға булған мөхәббәт һәм тоғролоҡтоң символы, шуға күрә уға һәр пионер хөрмәт менән, коммунист партия билетына ҡараған кеүек, ҡарарға тейеш. Пионер исеменә ошондай хөрмәт һәм яуаплы ҡараш тәрбиәләү, — пьесаның төп идеяһы ана шул.

Пьеса, сәхнәлә ҡуйыу өсөн генә түгел, былай уҡыу өсөн дә бик ҡыҙыҡлы һәм мауыҡтырғыс әҫәр. Был пьесаны Бөтә Союзда балалар яратып ҡарайҙар. «Ҡыҙыл галстук» тәржемәһе — Башҡортостан пионерҙарына, мәктәп балаларына — ҡәҙерле бүләк.

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһындағы һөнәрселек училищеларында уҡыусы отличниктәрҙең беренсе слеты булып үтте.



Һүрәттә: Слетта ҡатнашыусыларҙан бер төркөм. Һулдан уңға: З. Биктәшева (11-се номерле һөнәрселек училищеһе), Р. Мазитова (8-се номерле һөнәрселек училищеһе), П. Быков (11-се номерле һөнәрселек училищеһе), Х. Уразбаев (9-сы номерле һөнәрселек училищеһе), Н. Петров (14-се номерле махсус һөнәрселек училищеһе) һәм А. Савин (9-сы номерле һөнәрселек училищеһе).

В. Жданов фотоһы

Сәсеүлектәрҙе ауыл хужалығы ҡортҡостарынан нык һаҡларға

Ҡоро һәм эҫе көндәр төрлө ҡортҡостарҙың үрсеүе өсөн уңайлы шарттар тыуҙыра. [illegible] Ғафури һәм шәһәр советтары сәсеүсе башҡа райондарҙа [illegible] ҡортҡостары барлыҡҡа килде. Республикабыҙҙың төньяҡ һәм көнбайыш райондарында, бигерәк тә Янауыл, Балтас, Асҡын райондарында [illegible] ҙур зыян килтерәләр.

Ауыл хужалығы ҡортҡостары эшмәкәрлектәрен бик нык көсәйтәләр. Улар яңы ғына шытып сыҡҡан үҫемлектәр менән аҙыҡланалар һәм ҙур майҙандағы сәсеүлектәрҙе [illegible]. Әгәр ҙә уларға ҡаршы көрәште һис кисекмәҫтән бөтә урындарҙа ойошторолмағанда, ҙур майҙандарҙа сәсеүлектәр [illegible] ҡурҡынысы килеп тыуасаҡ.

Янауыл, Балтас, Асҡын һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙа колхозсылар һәм ауыл хужалығы специалистары ҡортҡостарға ҡаршы көрәш башланылар. Ләкин бөтә урындарҙа ла бындай хәстәрлек күрелмәй. Шул уҡ райондарҙың [illegible] ойошторолмаған. [illegible] беренсе нәүбәттә Ҡалтасы, Мишкә, Краснокама райондары инәләр.

Помогуша районында ла ҡортҡостарға ҡаршы көрәш [illegible]. Шуның арҡаһында райондағы [illegible] хужалығында — Максим Горький исемендәге колхозда 40 гектар майҙанлы көнбағыш ауыл хужалығы ҡортҡостары тарафынан тулыһынса ашалып бөтөрөлгән. Ә колхоз председателе Наумкин, колхоздағы агрономдар Егошин һәм Котельников иптәштәр сәсеүлектәрҙе ҡортҡостарҙан һаҡлау өсөн бер сара ла күрмәгәндәр һәм ҡортҡостарҙың булыуы турағында бер кемгә лә хәбәр итмәгәндәр.

Ауыл хужалығы ҡортҡостарына ҡаршы көрәштә бындай ғәмһеҙлеккә бер генә урында ла юл ҡуйылырға тейеш түгел. Ауыл хужалығы ҡортҡостарына ҡаршы көрәш — колхоздарҙың, ауыл хужалығы органдарының кисектергеһеҙ бурысы. Ҡайҙа ҡортҡостар һәм уларға ҡаршы көрәш шунда уҡ ойошторолорға тейеш. Был эште һуҙыуға һис тә юл ҡуйылырға ярамай. [illegible] ҡулланыу талап ителә.

Бөрсәләргә ҡаршы [illegible] кремне-фторлы натрийҙы йәки гексахлоранды [illegible]. Был эш иртәнге сәғәттәрҙә [illegible] Бөрсәләргә ҡаршы көрәштә яңы препарат дуст [illegible] файҙалы. [illegible] бер гектарға 20 килограмм, [illegible] культураларҙа бөрсәләргә ҡаршы 10—12 килограмм иҫәбенән ҡулланыла. Был препарат [illegible]. Кремне-фторлы натрий бер гектарға 8—10 килограмм иҫәбенән ҡулланыла. Шулай уҡ бөрсәләргә ҡаршы көрәштә [illegible] дуст та яҡшы һөҙөмтәләр бирә.

Сөгөлдөр һәм йәшелсә культуралары [illegible] ҡортҡостарға ҡаршы [illegible] файҙаланыу мөмкин. [illegible] 20 килограмм, [illegible] 400—500 грамм [illegible].

Ауыл хужалығы ҡортҡостарына [illegible] тейеш. [illegible]

Ауыл хужалығы ҡортҡостарына ҡаршы көрәште [illegible] бурысы булып тора.

А. Вертенников,

БАССР Ауыл хужалығы Министрлығының [illegible]

Е. Легер,

специалист-энтомолог.

Совхоздарҙа ғалимдәрҙең эше

Сталин премияһы лауреаты профессор С. Ф. Черненко Тамбов өлкәһе совхоздарында бер нисә йылдар буйынса тикшеренеү эше алып бара. Унда профессор Черненко тарафынан үрсетелгән бер нисә мең төп емеш ағасы ултыртылған.

Мәскәү өлкәһенең 1 Май исемендәге совхозында Сталин премияһы лауреаты профессор Лорх картуф сорттары һәм профессор Хаев йәшелсәләр агротехникаһы буйынса ғилми-тикшеренеү эше алып баралар.

Совхоз коллективтәренең ғалимдәр менән берҙәм эше фәнде һәм практиканы байыта, ауыл хужалығы культураһын алға ебәрә.

Предприятиеләрҙә партия контроле

ВКП(б) Уставы тәүге партия ойошмаларына администрацияның эшмәкәрлегенә контроль яһау хоҡуҡы бирә. Контролдең асылы шунан тора: партия ойошмаһы хужалыҡ етәкселәренең отчеттарын тыңлай, план үтәлешенә ҡомасаулыҡ яһаусы етешһеҙлектәрҙең сәбәптәрен тикшереп, уларҙы бөтөрөү һәм производствола эштәрҙе яҡшыртыу буйынса администрацияға кәңәштәр бирә, предприятиенең отчет материалдары менән танышып бара. Контроль хоҡуҡы партия ойошмаһын предприятиенең экономикаһын, кадрҙарҙы урынлаштырыуҙың торошон тәрән рәүештә өйрәнергә, оборудованиеларҙы, материалдарҙы дөрөҫ файҙаланыу, учет һәм тәьминәт эшенең торошо менән ҡыҙыҡһынырға, администрация тарафынан партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарының үтәлешен тикшерергә мәжбүр итә.

Партия ойошмаһы үҙе инициатива күрһәтергә, государство планын үтәү өсөн предприятиенең алдынғы кешеләре — партиялы һәм партияһыҙ большевиктәрҙең тәжрибәләрен һәм белемдәрен киң файҙаланырға, администрацияға бөтә яҡлап ярҙам итергә, масса араһында политик һәм ойоштороу эштәре алып барыу юлы менән администрацияның бойороҡтарының үтәлешен тәьмин итергә, социалистик ярыш һәм стахановсылар хәрәкәтен киң йәйелдерергә, бөтә эштә государство интерестәрен яҡларға, хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн көрәш алып барырға бурыслы.

Партия ойошмаһы предприятие етәксеһенең эштең торошо өсөн яуаплылығын көсәйтеү һәм уның авторитетын күтәреү өсөн көрәшергә тейеш. Сөнки етәксенең ялғыҙ яуаплылығы булмаған предприятиелә тәртиптең дә, нормаль эшләү өсөн кәрәкле шарттарҙың да булыуы мөмкин түгел. Шуның өсөн дә партия ойошмаһы үҙенең исеменән хужалыҡ мәсьәләләренә ҡағылышлы күрһәтмәләр бирә алмай, работниктәрҙе эшкә урынлаштырырға йәки эштән алырға ла уның хаҡы юҡ. Был эштәр бөтәһе лә предприятие етәксеһенең функцияһына инә. Ҡыҙғаныսҡа ҡаршы, ҡайһы бер партия ойошмалары быға тейешенсә иғтибар биреп еткермәйҙәр. Мәҫәлән, «Фото-художник» артеленең партия ойошмаһы йыйылышы 1948 йылдың 4 мартында түбәндәге ҡарарҙы сығара:

«Цех начальнигы Донииде бухгалтер менән килешә алмағаны өсөн 15 марттан эшенән бушатырға».

Был мәсьәләне артелдең председателе үҙе хәл итә алмаймы ни? Бындай ҡарар предприятиелә етәксенең ялғыҙ яуаплылығын нығытыуға хеҙмәт итмәй, ә киреһенсә, уның ролен түбәнәйтеүгә килтерә.

Үҙенең хоҡуҡынан дөрөҫ файҙаланған партия ойошмаһы администрацияның эшмәкәрлегенә контролде етәксенең ялғыҙ яуаплылығына зарар килтермәйенсә тормошҡа ашыра ала. Хужалыҡ етәкселәренең эшмәкәрлеге һәм партия ойошмаһының ойоштороу-массовый эше бер маҡсатҡа йүнәлдерелгәндә генә предприятиелә тулы тәртип һәм ныҡлы дисциплина урынлаштырырға мөмкин. Әгәр директор бер ҙур эш башҡарырға уйлаһа, ул приказдар ярҙамында ғына тейешле һөҙөмтәгә ирешә аламы? Әлбиттә юҡ. Приказ һәм бойороҡтар кешеләр тарафынан үтәлә. Әгәр партия ойошмаһы уларҙы массаға аңлатыу эштәре менән нығытһа, билдәләнгән маҡсатҡа өлгәшеү өсөн көрәшкә бөтә коллективте күтәрһә генә тейешле һөҙөмтәгә ирешергә мөмкин. Активтең ярҙамынан, партия һәм хужалыҡ етәкселәренең берҙәм эшенән башҡа уңышҡа өлгәшеп булмай. Быға миҫал итеп шундай фактты алайыҡ: телефон аппаратуралары заводының элекке директоры иптәш Сопельняк ике цехты хужалыҡ иҫәбенә күсерергә ҡарар итә. Партия ойошмаһы һәм производство алдынғылары менән кәңәшләшеп тормайынса, был турала приказ яҙып уны цехтарға канцелярия методы менән еткерә. Шуңлыҡтан, был приказ эштә һис бер төрлө үҙгәреш яһай алмай. Тик, һуңынан, приказды ойоштороу-партия эше менән нығытҡас ҡына, көткән һөҙөмтәгә өлгәшелә.

Күп кенә партия ойошмалары контроль хоҡуҡынан дөрөҫ файҙаланмайҙар әле. 8 март исемендәге фабриканың тәүге партия ойошмаһы (секретаре иптәш Хромилова) производство мәсьәләләренә иғтибарҙы бөтөнләй йомшартты. Ул ваҡ мәсьәләләр менән күберәк мауыға. Ә производствоның мөһим, перспектив мәсьәләләре менән бөтөнләй шөғөлләнмәй. Шуға күрә лә, фабриканың 1 квартал планын 92 процентҡа ғенә үтәүе ғәжәп түгел. «Октябрь Натискаһы» типографияһындағы партия ойошмаһының эше лә шундай уҡ хәлдә. Печатный цех бөтә типографияның эшенә тотҡарлыҡ яһап килә. Партбюро цех начальнигы Самойлов һәм профсоюз ойошмаһы цех комитете председателе Хаитов иптәштәрҙең «Социалистик ярыштың торошо турағындағы» отчеттарын тыңларға була. Ә отчет буйынса партбюрола шундай ҡарар ҡабул ителә:

«Типография директоры иптәш Ждановты оборудованиеларҙың торошо өсөн мөмкин булған бөтә (?) сараларҙы күрергә мәжбүр итергә.

Иптәш Хаитовты систематик рәүештә газеталар уҡыу юлы менән массовый-политик эште көсәйтергә мәжбүр итергә. Социалистик ярышҡа 100 процент менән йәлеп итергә».

Бындай ҡарарҙың предприятиелә эште яҡшыртыу өсөн бер ниндәй ҙә файҙаһы юҡ. Сөнки эште яҡшыртыу өсөн конкрет бер генә сара ла билдәләнмәгән. Ә партия ойошмаһының ҡарары конкрет, аныҡ яҙылырға, коллектив өсөн билдәле бер ваҡыт эсендә эш программаһы булып хеҙмәт итергә тейеш.

Партия ойошмаһы, предприятие етәксеһенең отчетын йыйылышҡа ҡуйып тикшереү алдынан, эштең торошо менән ентекләп танышырға тейеш. Әҙерлекһеҙ ҡуйылған мәсьәлә йыйылышта формаль рәүештә генә тикшерелә, администрацияның эшенә дөрөҫ юнәлеш бирә алмай. «Швейпром» артеле партия ойошмаһының «эш» практикаһы быға асыҡ миҫал булып тора. Партбюроның 5 мартта булып үткән ултырышында «февраль айы эшенең йомғаҡтары һәм март айындағы бурыстар» тигән мәсьәлә тикшерелә. Бында: «февраль айында планды арттырып үтәүҙә өлгәшелгән уңыштарҙы нығытырға һәм март айы планын үтәргә һәм арттырып үтәргә» тигән үҙ-үҙенде тынысландырыусы ҡарар ҡабул ителә. План үтәлешен тәьмин итеү өсөн ниндәй эштәр башҡарырға кәрәк, коммунистәргә ниндәй бурыстар йөкмәтелә, администрация нәмә эшләргә тейеш? Был турала ҡарарҙа бер нәмә лә әйтелмәй. Һөҙөмтәлә, хеҙмәт етештереүсәнлеге ҡырҡа түбәнәйә. Март айында производство планы ни бары 85 процентҡа генә үтәлә.

Партия ойошмаларының күп кеһәһе ағымдағы мәсьәләләр менән генә мауығалар. Йыйылыштарҙа «план үтәлешенең барышы», йә булмаһа «үткән айҙың йәки кварталдың йомғағы» мәсьәләләре генә тикшерелә. Ярма заводы партия ойошмаһының бюроһы «Ғинуар айы эшенең йомғаҡтары һәм февраль айындағы бурыстар» тигән мәсьәләне тикшереп, «Ғинуар айындағы уңыштарҙы нығытырға һәм февраль айында планды үтәүгә өлгәшергә» тигән ҡарар сығара. 2 мартта тағы ла «Февраль айының йомғаҡтары» тикшерелә. Завод директоры Тайпов «план 121,2 процентҡа үтәлде» тип белдерә. Мартта ла шундай уңыштар «көтөләүен» хәбәр итә. Партбюро үҙ-үҙен тынысландырыу настроениеһенә бирелә. Эшселәр араһында массовый-политик эштәрҙе көсәйтеү буйынса конкрет саралар билдәләнмәй. Быны күңелһеҙ һөҙөмтәһе асыҡ: март планы 52,6 процентҡа, ә апрель планы ни бары 36,1 процентҡа генә үтәлә.

Ҡайһы бер тәүге партия ойошмалары етәкселәренең производствоға ниндәй метод менән йоғонто яһарға белмәүҙәре партия йыйылыштары һәм бюро ултырыштарының хужалыҡ мәсьәләләре буйынса сығарған ҡарарҙарының администрация приказынан һис бер төрлө айырмаһы булмауына килтерә. 8 март исемендәге тегеү фабрикаһының директоры иптәш Сиразиев комсомолец-йәштәр бригадаларының эштәренә смотр үткәреү турағында приказ сығара. Партия ойошмаһының секретаре иптәш Хромилова, 17 пункттан торған ошо приказ менән танышҡандан һуң, бюро ултырышы үткәрә. Унда шул уҡ приказды күсереп, «бойороҡ» тигән һүҙҙе «тәҡдим итергә», «мәжбүр итергә» тип алыштырып ҡына яҙылған ҡарар ҡабул ителә. Ә бюро, партия ойошмаһы был приказды тормошҡа ашырыу өсөн массовый политик эште киң йәйелдереү юлы менән коммунистәрҙе, комсомолецтарҙы һәм бөтә коллективте мобилизовать итергә тейеш ине.

Күп кенә предприятиеларҙың тәүге партия ойошмалары дисциплинаны нығытыу, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, материалдарҙы, сырьены, электр энергияһын экономиялы тотоноу, продукцияның сифатын күтәреү һәм үҙен төшөү хаҡын кәметеү өсөн көрәшкә коллективте мобилизовать итеү эшенә етерлек иғтибар бирмәйҙәр. Ә, был эштәр предприятиеларҙағы тәүге партия ойошмаларының төп бурысы булып торорға тейеш.

Ҡалалағы партия ойошмаларының эшендәге был етешһеҙлектәрҙе тиҙ арала бөтөрөләргә тейеш. Тәүге партия ойошмалары, ВКП(б) Уставы тарафынан бирелгән администрацияның эшмәкәрлегенә контроль яһау хоҡуҡын дөрөҫ һәм тулыһынса файҙаланып, промышленность предприятиеларының производство планын үтәүҙәрен, ритм(?), табелле һәм государство дотацияһынан башҡа эшләүгә күсеүҙәрен тәьмин итергә бурыслылар.

И. Репин,

ВКП(б) Өфө ҡала Комитетының ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге мөдире.

1848 — Бөйөк Революцион демократ — 1948

В. Г. Белинский Ватан тураһында

«1940-сы йылғы Российны — бөтә уҡымышлы донъя башында торасаҡ, фәнгә һәм искусствоға закондар бирәсәк, барлыҡ белемле кешелек тарафынан ололау хөрмәте аласаҡ Российны күрәсәк балаларыбыҙҙың балаларына һәм уларҙың балаларына беҙ һоҡланабыҙ; рус әҙәбиәтенең икенсе бытаты, — ти беҙгә күнелебеҙ,—данлы, бик гүзәл быуат буласаҡ: уны, әҙәбиәтте дөрөҫлөк юлына баҫтырып, рус тойғоһон халыҡсанлыҡҡа килтереп һәм аҡылды, һуңғы ваҡытта кешелек тоҡомо семьяһының донъя даһиҙәре, оло улдар шатлыҡ сәскән донъяны күреүгә килтереп, әле тамамланған йөҙ йылдыбыҙ әҙерләне. Бер тапҡыр билгеле һәрәкәт туҡталмаясаҡ, һәм ваҡыт үҙенең осошо менән уны үҫтерәсәк кенә».

* * *

«Үҙ Тыуған илеңде һөйөү — ул кешелек идеалының унда тормошҡа ашырылыуын күрергә ялҡынлы теләү һәм үҙеңдең көсөңдән килгәнсә шуны булдырырға ярҙамлашыу тигән һүҙ».

* * *

«Беҙ, рустар — Европа тормошоноң ғына түгел, тотош донъяның мираҫын алыусылар һәм хаҡлы рәүештә мираҫын алыусылар. Беҙ инглиздар ҙа, французлар ҙа, немецтар ҙа булырға тейеш түгелбеҙ һәм була алмайбыҙ, сөнки беҙ рустар булырға тейешбеҙ; ләкин беҙ, Европала йәшәүсе һәр халыҡтың тормошондағы иң яҡшы яҡтарҙы үҙебеҙҙеке итеп аласаҡбыҙ, улар иң яҡшы булған өсөн түгел, ә беҙҙең тормошобоҙҙо тулыландырыусы элемент итеп аласаҡбыҙ. Был яҡшы яҡ үҙенең эсенә халыҡсан физиономияны һәм халыҡсан характерҙы алған, йәнле конкрет һәм ысынбарлыҡтан ситләшмәгән иң яҡшы яҡ, булырға тейеш».

* * *

«...Россия — киләсәк иле. Россия, үҙ обществоһының белемле кешеләре йөҙөндә, үҙенең тарихта тотасаҡ урынының бөйөклөгөн, үҙенең киләсәгенең енелмәҫ алдан тойоуын үҙ рухында йөрөтә».

* * *

«Капиталистар ҡулында булған государствоға — ҡайғы, ул кешеләр патриотизмһеҙҙәр ҙә, бер төрлө юғары «ойғоноҙҙар ҙа. Улар өсөн һуғыш йәки ярашыу барыһы фондарҙың күтәрелеүе йәки төшөүе генә — шунан ары улар бер нәмә лә күрмәйҙәр».

* * *

«Россия, бәлки, социаль мәсьәләләрҙе иң яҡшы хәл итә белер һәм, Европаға ҡарағанда, капитализм һәм милекселек менән эште элегерәк бөтөрөр».

* * *

«Коллоҡ... был яман сыйҡан Россияның үҫеше өсөн иң кәрәк булған яҡшы көстәрҙе урлап тора. Ышанығыҙ минә, рус халҡы иң тиклем ҡара булһа ла, үҙенең интегеүҙәрен туҡтатыу өсөн был сыйҡанды ярыу һәм унда йыйылған йорошло эренде таҙартыу кәрәклеген бик яҡшы аңлай. Билдәле, беҙҙең балаларыбыҙ йәки уларҙың балалары был яман сыйҡан бөткән саҡтың шаһиттәре булырҙар: йәки халыҡ үҙе был сыйҡанды төртөп тишер, йәки оҫта ҡул был операцияны яһар. Был хәл булған саҡта, шатлыҡтан минең һөйәктәрем һелкенерҙәр».

* * *

«Беҙгә, рустарға, үҙебеҙҙең политик һәм государство әһәмиәтебеҙ тураһында шикләнергә урын юҡ: барлыҡ славяндар араһында тик беҙ генә ныҡ һәм ҡеүәтле государство булып ойоштоҡ, һәм Бөйөк Петрға саҡлы ла, шулай уҡ Петрҙан һуң да хәҙерге минутҡа саҡлы яҙмыштың бер нисә ҡат ҡаты һынауын намыҫ менән үткәрҙек, бер нисә тапҡырҙар һәләкәт сигендә булдыҡ һәм һәр ваҡыт һәләкәттән ҡотолоп, һуңынан тағы ла ҙурыраҡ көс һәм ныҡлыҡ менән яңынан килеп сыға алдыҡ. Эске үҫештән мәхрүм булған халыҡта бындай көс, бындай ныҡлыҡ булырға мөмкин түгел. Эйе, беҙҙә милли тормош бар, беҙ донъяға үҙ-үҙебеҙҙе, үҙ фекерҙәребеҙҙе әйтергә тейеш буласаҡбыҙ, ләкин ниндәй һүҙ ул, — бының тураһында беҙгә баш ватырға иртәрәк әле. Беҙҙең балаларҙың балалары һәм уларҙың балалары быны көсәнеп аҙапланмайынса уҡ белерҙәр; сөнки был һүҙ, был фекер улар тарафынан әйтеләсәк».

* * *

«Беҙ юристар ҙа, юриспруденциялә, римлеләр ҙә булырбыҙ, ләкин беҙ шағирҙәр ҙә, философтар ҙа булырбыҙ, артист халыҡ, ғилми халыҡ, һәм һуғышсан халыҡ, промышленносле, сауҙалы, обществолы халыҡ булырбыҙ».

Докладтар һәм беседалар

ДӘҮЛӘКӘН. (Телефон аша). Бөйөк рус тәнҡитсеһе В. Г. Белинскийҙең иҫтәлек көндәрен район хеҙмәтсәндәре ҙур әҙерлек менән үткәрәләр. Был бигерәк тә уҡыусылар араһында ныҡ һиҙелә. Бөтә мәктәптәрҙә кисәләр булды. Педагогия училищеһендә В. Г. Белинскийгә арналған бер нисә беседа һәм доклад уҙғарылды. Бөйөк ижадсының тормош юлын күрһәткән күргәзмә ойошторолдо. Өфөнән килгән яҙыусылар Ғариф Гүмәр һәм Әхтәм Ихсан иптәштәр татар мәктәбендә В. Г. Белинский тураһында әҙәби кисә үткәрҙеләр.

БӘЛӘБӘЙ. (Телефон аша). Ҡала хеҙмәтсәндәре В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу көнөн билдәләйҙәр. 5 июндән алып 10 июнгә тиклем бөтә предприятиеләрҙә, учреждениеларҙа һәм мәктәптәрҙә «Бөйөк рус тәнҡитсеһе» тигән темала беседалар үткәрелә. Библиотекала һәм парткабинетта В. Г. Белинскийҙең тормошон һәм ижадын күрһәткән китаптарҙан һәм фотоларҙан витрина яһалды.

Бөгөн ҡала театры бинаһында В. Г. Белинский иҫтәлегенә арналған балалар иртәһе була, 10 июндә хеҙмәтсәндәрҙең дөйөм ҡала йыйылышы үткәреләсәк.

А. С. Суворин һүҙенә ҡарағанда, Некрасов үҙенең Гоголь менән осрашыуы тураһында шулай һөйләй: «Ул бер саҡ беҙҙең менән осрашыуға килеү теләген белдерҙе. Мин, Белинский, Панаев һәм Гончаров фрактар кейҙек тә, начальник менән осрашыуға барған кеүек, Гоголгә киттек. Гоголь беҙҙе тап начальник кеүек ҡабул итте лә: һәр кемдән берәр нәмә һорашты, һәр кемгә ни ҙә булһа әйтте. Мин уға «Ватан» тигән шиғырымды уҡыным».

Художник Б. Лебедев был рәсемдә уларҙың ошо осрашыуҙары ваҡытын сағылдырған.

В. Г. Белинский тураһында В. И. Ленин

«Белинскийҙең әҙәби эшмәкәрлеге йәмғиәт яғынан, уның атаҡлы «Гоголгә хаты» демократик матбуғаттың цензурағаса үтмәгән иң яҡшы әҫәре булды һәм ул хәҙер ҙә үҙенең бөйөк әһәмиәтен юғалтмаған».

* * *

«... Алдынғы көрәшсе ролен тик алдынғы теория тарафынан етәкселек ителгән партия ғына башҡара ала. Ә бының ни тигән һүҙ икәнлеген аҙ-маҙ конкрет рәүештә күҙ алдына килтереү өсөн уҡыусы Герцен, Белинский, Чернышевский һәм 70-се йылдар революционерҙарының гүзәл плеядаһы кеүек, социал-демократиябыҙың предшественниктарын хәтерләһен; хәҙер рус әҙәбиәтенең ниндәй бөтә донъя әһәмиәтенә эйә булыуы хаҡында уйлаһын...».

* * *

«Белинский, әле крепостнойлыҡ осоронда уҡ, дворяндарҙы разночинецтар тарафынан тулы ҡыҫрыҡлап сығарыусы беҙҙең азатлыҡ хәрәкәтебеҙҙең алдан килеүсеһе булды».

100 йыллыҡ уңайы менән

Бөйөк рус тәнҡитсеһе В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыу айҡанлы Башҡортостан совет яҙыусылары союзы байтаҡ практик эштәр үтәне. Был уңай менән Белинскийҙең күп кенә әҫәрҙәре башҡорт теленә тәржемә ителде. Был йыйынтыҡ 12 табаҡ күләмендә ошо йылда баҫылып сыға.

«Октябрь» журналының июнь номерында Белинскийҙең ижады һәм тормош юлы тураһында Гредельдең мәҡәләһе һәм тәнҡитсенең «Гоголгә хат» тигән атаҡлы хеҙмәте баҫыла. Былардан тыш Черниковск ҡалаһында, Өфөлә Белинскийҙең ижадына арналған йыйылыштар һәм кисәләр үткәрелде.

100 йыллыҡ уңайы менән Черниковск ҡалаһында йәштәр өсөн шағир Хәниф Кәрим доклад яһаны, ҡала интеллигенцияһы өсөн кисә үткәрелде. Октябрьск ҡалаһында, Дәүләкән МТС-ында һәм мәктәптәрҙә, Өфөнөң электромеханика техникумында Башҡортостан яҙыусылары ҡатнашлығында Белинскийгә арналған кисәләр үтте. Колхозсылар, интеллигенция һәм уҡыусылар Белинскийҙең хеҙмәттәре менән таныштырылды.

С. К.

Гончаров үҙенең «Ябай тарих» тигән романын В. Г. Белинскийға уҡый.

Художник Б. Лебедев рәсеме.

Бөйөк традициялар

Беҙҙең социалистик общество шарттары бөйөк Союзға берләшкән барлыҡ милләттәрҙең дә культураһын сәскә атыуға килтерҙе. Элек быуаттар буйынса артта ҡалып килгән, батша Российяһының «окраинаһы» һаналған ваҡ халыҡтарҙың культура үҫеше Октябрҙән һуңғы ҡыҫҡа утыҙ йыл ваҡыт эсендә алға табан гигант һикереш яһаны. Был процесстә талантлы рус халҡының культура хазинаһы баһалап еткереүе мөмкин булмаған ҙур роль уйнаны. Киң күңелле, бай йөрәкле рус халҡы үҙ хазинаһының гүзәл гәүһәрҙәрен, ныйы таштарын үҙенең туғандары, коммунистик общество төҙөүҙәге соратниктәре булған башҡа халыҡтарға йомарт ҡул менән бүләк итте һәм итә. Бөйөк рус халыҡ шағире Пушкин беҙҙең илдә рус шағире генә булыу рамкаһынан сыҡты; Пушкин инде СССР-ҙа йәшәүсе барлыҡ милләттәрҙең дә туған шағиренә әйләнде. Лермонтов менән дә, Грибоедов менән дә, Гоголь менән дә, рус әҙәбиәтенең башҡа бик күп титандары менән дә шундай уҡ хәл булды. Шул уҡ ваҡытта рус халҡы башҡа халыҡтарҙың культура ҡаҙаныштарын шундай уҡ киң күңеллелек менән үҙ хазинаһына ҡабул итә. Грузин шағире Руставели, Азербайжан шағире Низами, үзбәк шағире Навои, украин шағире Шевченко, татар шағире Тукай, башҡорт шағире Ғафури рус халҡы өсөн дә, башҡа барлыҡ совет халыҡтары өсөн дә яҡын, туған шағирҙарға әйләнә баралар. Улар бөтәһе лә совет халҡының бөйөк милли ғорурлығын тәшкил итәләр. Был — ғәйәт ҙур, тарихи әһәмиәткә эйә булған процесс. Был — беҙҙе коммунизмдең тулы еңеүенә яҡынайта торған процесс. Ул беҙҙең социалистик культураның, әкиәттәрҙәгеcә, ай үтһен көн үтеп, йыл үтһен ай үтеп, иң киткес ҡыҙыу аҙымдар менән үҫеүенә, күтәрелеүенә килтерә.

XIX быуатта рус әҙәбиәтенең донъяла иң алдынғы әҙәбиәт булыуы үҫеүенә юл ярып биргән бөйөк Белинский уның рус революционерҙарының бер нисә быуыны идея яғынан формалаштырған ижады, уның азатлыҡҡа саҡырған ораны батша палачтарының, полиция жандармдарының һәм черносотенсы цензураның тимер рәшәткәләре аша үтеп, алыҫ «окраиналарҙа» ла яңғыраны. Белинский һәм уның юлын дауам иттереүселәрҙең әҙәбиәттә халыҡсанлыҡ, гуманлылыҡ, граждандыҡ идеяларын күтәргән революцион традициялары октябргә тиклем Тукайҙы — Туҡай, Ғафуриҙе — Ғафури итеп күтәргән көстәрҙең иң ҙурыһы. Бының шулай икәнлеген Тукай һәм Ғафуриҙең ошо традициялар рухында яҙылған һәр бер ҡайнар шиғыр юлы иҫбат итә.

Беҙҙең ил өҫтөнән шаулап үткән Октябрҙең таҙартҡыс дауылы иҙелгән миллион халыҡтарға ирк һәм бәхет килтерҙе. Революция Белинскийҙең утлы, хаҡ һүҙен әҙәрләнеүҙән, боғауҙан ҡотҡарҙы. Белинскийҙең үлмәҫ ижад байлығы Пушкин һәм Грибоедов, Лермонтов һәм Гоголь әҫәрҙәре кеүек уҡ, хәҙер СССР-ҙа йәшәүсе барлыҡ халыҡтарҙың да уртаҡ культура байлығына әйләнде. Иптәш Жданов әйткәнсә «Совет әҙәбиәтенең иң яҡшы традицияһы — ... беҙҙең бөйөк революцион демократтарыбыҙ — Белинский, Добролюбов, Чернышевский, Салтыков-Щедрин тарафынан тыуҙырылған, Плеханов тарафынан дауам иттерелгән һәм Ленин менән Сталин тарафынан ғилми эшләнгән һәм нигеҙләнгән традицияларҙың дауамы» ул.

Башҡорт совет әҙәбиәте, башҡа туғандаш халыҡтарҙың әҙәбиәттәре кеүек уҡ, бына ошо традициялар нигеҙендә үҫеп сыҡты. Ленин — Сталин партияһының оло хәстәрлеге һәм етәкселегендә сәскә атты һәм емеш бирә. Башҡорт совет яҙыусылары ла Белинский башлап ебәргән реализм методын өйрәнеү аша, рус халҡының бөйөк улы Горький күтәргән социалистик реализм методын үҙләштереүгә киләләр, шулар нигеҙендә ҡанаттарын нығыталар, социалистик культураның күҙ сағылдырғыс яҡты бейеклегенә ынтылалар.

Ғәйнан Әмири.

Тәнҡитсе хөрмәтенә

Республика библиотекаһының уҡыу залында В. Г. Белинский әҫәрҙәренән, Белинский тураһындағы әҫәрҙәрҙән, уның тураһында Ленин — Сталин һүҙҙәренән, Белинскийҙең ватан, халыҡ, әҙәбиәт, тәрбиә тураһындағы һүҙҙәренән күргәзмә төҙөлдө.

5 июндә библиотека залында В. Г. Белинскийҙең үлеүенә 100 йыл тулыуға арналған әҙәби-музыкаль кисә үткәрелде. Филология фәндәре кандидаты М. Пизов, «Бөйөк рус әҙәбиәтендә В. Г. Белинскийҙең роле» тигән темаға доклад яһаны.

Докладтан һуң библиотеканың активистары — музыкаль — һәм театраль училищелар уҡыусылары Чайковский, Глинка һәм совет композиторҙары әҫәрҙәренән торған ҙур концерт бирҙеләр.

Кисәлә 300-ҙән артығыраҡ уҡыусы, уҡытыусы, фән работниктары, инженерҙар, врачтар ҡатнаштылар.

Бынан башҡа, 15 майҙа уҡ инде республиканың бөтә район библиотекаларына юбилейҙе үткәреү буйынса методик хаттар, әҙәбиәт һайлауҙа күрһәтмәләр, лекция, доклад һәм беседалар өсөн темалар ебәрелде.

Башҡортостан ауыл хужалығы институтында В. Г. Белинский юбилейына арналған ғилми совет ултырышы булды. Марксизм-ленинизм кафедраһы мөдире иптәш Г. Ильченко В. Г. Белинскийҙең тормош һәм ижад юлы тураһында доклад һөйләне.

Шул уҡ доклад һәм Белинский әҫәрҙәре буйынса студенттарҙың сығышы менән кисә ойошторолдо.

Институт библиотекаһы Белинский әҫәрҙәренән бай йыһазландырылған күргәзмә төҙөнө.

В. Г. Белинский

Бөйөк революцион демократ Виссарион Григорьевич Белинский, теоретик — общественник һәм әҙәби деятель булып, үткән быуаттың утыҙынсы йылдарында күтәрелде. Азатлыҡҡа ынтылған крепостной крәҫтиәндәрҙең интерестарын сағылдырҙы ул. Обществоның тарихи үҫеш закондарын, башҡа үҙ замандаштарына ҡарағанда, ул яҡшыраҡ күрҙе, мәсьәләләрҙең яңы, элек иштелмәгән, социаль һәм политик талаптарын һиҙҙе һәм үҙенең гениаль мәҡәләләрендә шуның сағылдырыусыһы булды.

Уның дәйәлы эшмәкәрлеге рус общество тормошонон, фекерененң үҫешендә ысын борылош башланыуын билдәләне. Самодержавия һәм крепостнойлыҡтың дошманы Белинский яңы публицистиканың башланғысын һалды. Герцен менән бергә Российяла философик фекерҙе күрелмәгән бейеклеккә күтәрҙе, әҙәбиәт үҫешен критик реализм юлына бороп ебәрҙе.

Белинский эшмәкәрлегендә, баштан уҡ, крепостной ҡоллоҡҡа ҡаршы протест, иҙелгәндәрҙе азат итеү өсөн көрәш ынтылыштары сағылдылар. Тик, ҡаты ауырыу һәм мохтажлыҡ һөҙөмтәһендә ваҡытһыҙ үлеп китеүе генә уның был эшмәкәрлеген өҙҙө. Ул, һаман кеүек, Российяла алдынғы общество хәрәкәтенең вожатыйы, көслө үҫеүсе рус классик әҙәбиәтенең идея юлбашсыһы булараҡ поста үлде.

Белинский, барынан элек, һәр ваҡыт дөрөҫ революцион теорияға ынтылыусы — гениаль теоретик булды. Философия мәсьәләләре, тормош мәсьәләләре кеүек уҡ, уны тулыландырҙылар. Философияла ул үҙенең иҙелгән илен үҙгәртеүҙең төп политик һәм социаль программаһына нигеҙләү эҙләне. Белинский философияла **идеалды реаль нигеҙләү методтарын, революцион хәрәкәткә илтә торған методтарҙы** табырға тырышты. Үҙенең иң беренсе ҙур «Әҙәби хыялланыуҙар» мәҡәләһендә уҡ ул: «Кеше, үҙеңдең юғары әһәмиәткә билдәләнеүең менән ғорурлан, ғорурлан, ләкин онотма... тормош — хәрәкәт итеү, ә хәрәкәт итеү — көрәш ул... көрәшһеҙ хеҙмәт ҡаҙаныу, хеҙмәт ҡаҙаныуһыҙ награда юҡ, ә хәрәкәтһеҙ тормош юҡ.» тип яҙҙы.

Ысын демократизм, революцион дәрт, халыҡсанлыҡ Белинскийҙе үҙ замана философияһының башлап барыусыһы иттеләр.

Белинский башта Гегель учениеһына ныҡ иғтибар бирә. Ләкин, Гегелдең боҙолған идеалистик формалағы диалектикаһы ысын диалектиканың революцион роленә ҡаршы килә икәнен, Гегелдең идеалистик системаһы ҡатып ҡалған һәм реакцияға илтә икәнен ул тиҙ аңлай. Белинский, Гегель системаһын аяуһыҙ тәнҡитләй, «үҙ ҡан ҡәрҙәштәренең» йәғни халыҡ массаларының ауыр хәле тураһында хисап биреүҙе талап итә. Герцен һүҙе менән әйткәндә, йәш Российяның трибуны — һайланып сыҡҡан айырым кешеләр өсөн генә түгел, ә бөтә халыҡ өсөн бәхет даулай.

Гегелгә ҡарата Белинский үҙе киләсәккә яңы юл һалыусы, үҙ алдына эшләүсе, батыр фекер йөрөтөүсе итеп бөтә ышандырырлыҡ көс менән күрһәтте. Белинский материалист, атеист, революционер, социализмде ҡурҡыуһыҙ өндәүсе булды.

«Ярһыулы Виссарион» рус крепостной ҡоллоҡҡа һәм ҡараңғылыҡҡа ҡаршы сығыу менән генә сикләнмәне. Ул капитализмдең йыртҡыслыҡ асылын ҙур асыу менән фашлаНы, Көнбайышта тантана иткән буржуазияны халыҡ енәр һәм был екеү яҡын тип иғланды. «Милли намыҫы, милли ғорурлығы булмаған» буржуазия тураһындағы уның һүҙҙәре сикһеҙ нәфрәт һәм күрә алмау менән һуғарылған.

Бөйөк тәнҡитсе үлгәндән һуң йөҙ йыл эсендә буржуазия һәр бер илдә үҙ халҡының тағы ла кешелекһеҙерәк дошманына, культура һәм цивилизацияның дошманына, донъя ҡоротоусы һуғыш суҡмарына әйләнде.

Демократизм менән социализмдең тулы ҡушылыуын характерләгән алдынғы идеяға В. Г. Белинский ауыр, урау юлдар аша, үҙенең ҡыҫҡа ғүмеренең һуңдарында, үҙендәге гегельянствоны еңеп, революцион хәрәкәткә ышаныу аша килде. Бөйөк рус халҡының улы йәш Маркс һәм Энгельс үткән идеологик юлдар буйлап үтте. Ләкин крепостной ҡоролош шарттарында ул, тәбиғи, ғилми социализм идеяһы юғарылығына күтәрелә алманы. Уның материализме деаликтик та, тарихи ҙа түгел. Синфи көрәш — общество үҫешенең нигеҙе икәнлеген ул аңлап етә алманы. Белинскийҙең социализме — утопия социализме булһа ла, ул, Көнбайыш Европа утопистарының революцион практиканы кире ҡағыусы социализменән байтаҡ өҫтөн ине.

Әҙәбиәт һәм искусство теоретиге Белинский эҙмә-эҙ реализм принциптарын тарат һәм асыҡ итеп эшләп бирҙе. Әҙәбиәттән, барынан элек, дөрөҫлөк талап итте ул.

Белинский, үҙ эшмәкәрлегенең башланғыс йылдарындағы «искусство — искусство өсөн» тигән теория менән мауығыуҙарынан тиҙ ҡотолоп, искусство һәм художниктең обществолағы тотҡан урынын, уларҙың обществоны үҙгәртеп ҡороуҙа этәргестәр, халыҡтың хеҙмәтселәре булыуҙарын билдәләй һәм яҡлай.

Теоретик тәрәнлеккә, художество һиҙгерлеген һәм обществоның алдынғы маҡсаттарын бергә ҡушыу Белинскийҙе рус әҙәбиәтенең генә түгел, шулай уҡ донъя әҙәбиәтенең дә бөйөк тәнҡитсеһе яһаны. Ул яуап бирмәй ҡалған бер генә әҙәбиәт күренеше лә булманы. Белинский рус яңы әҙәбиәтенең иң беренсе ысын авторитетле тәнҡитсеһенә әйләнде. Уның Пушкин, Лермонтов, Гоголь һәм башҡа яҙыусыларға биргән баһалары бөгөн дә хәл иткес әһәмиәткә эйә булып ҡалалар.

Белинский яҙыусыны таный, баһалай белеү генә түгел, уның үҫешен, ижадын халыҡсанлыҡҡа йүнәлтә лә белде. Йәш Некрасовҡа Белинский йүнәлеш күрһәтте һәм уның «асыу һәм ҡайғылар» шағире булып үҫеүенә ярҙам итте. Шуға күрә лә Некрасов уны үҙенең уҡытыусыһы тип атаны.

Ялҡынлы патриот Белинский рус культураһының киләсәктә уйнаясаҡ айырым алдынғы ролен алдан күрә белде. Россия «аҡыл һәм таланттар менән ҡайнап торған йәш һәм көслө ер» икәнлеген ул аңланы. Уның: «Иң тиклем күп йәшәгән һәм уйлаған һайын Русте шул тиклем күберәк һәм ҡаным менән һөйәм» тигән һүҙҙәре ҡайнар йөрәк уты менән әйтелделәр. Революцион рус халҡының яҡты киләсәгенә, Российяның киләсәктә тотасаҡ бөйөк урынына ул ныҡ ышанды.

Российяның киләсәктә тотасаҡ бөйөк урынына Белинскийҙең ышаныуы — социалистик һәм демократик рус революцияһына уның ышаныуҙарына нигеҙләнгән ине. Азат ителгән рус халҡының донъя ҡаршыһында яңы юл һаласағына, башҡа халыҡтар ҙа шул юл менән китәсәгенә ул ышанды.

Рус халҡы хеҙмәтсәндәр массаһының яҡтылыҡҡа, азатлыҡҡа, социализмға барыу хәрәкәтен ысындан да һис бер нәмә туҡтата алманы. Эшселәр синыфы партияһы юлбашсылығында ул Октябрь революцияһына, социализм тантанаһына, культураның күрелмәгән сәскә атыуына килде. Фашизмде еңеү һәм һуғыштан һуң донъя реакцион көстәренә ҡаршы көрәш — совет социалистик төҙөлөш культураның ныҡлы тәрәге, цивилизацияның ышаныслы ҡалҡаны икәнлеген бөтә ер шарының намыҫлы кешеләренә асыҡ күрһәтте; Белинскийҙең илһамланып әйткән һүҙҙәре үталделәр.

Рус общество фекеренең, рус культураһының донъя күләмендәге ролен урынлаштырыуҙа халыҡтың бөйөк улы Виссарион Григорьевич Белинский ҙа үҙенең ғүмере һәм эшмәкәрлеге менән булышлыҡ итте, Белинскийҙе Россия революцион социал-демократияһының алдан килеүсеһе, тип атаны В. И. Ленин.

Совет кешеләре Белинскийҙе, беҙҙең халыҡтың иң бөйөк һәм данлыҡлы эшмәкәре сифатында, иҫкә алалар һәм һөйәләр.

В. Кирпотин.

Республика экрандарында

„Рядовой Александр Матросов“

Был фильм икеләтә беҙҙеке: Совет кинофабрикаһында эшләнгәнгә генә түгел, картинаның геройы Өфө егете Александр Матросов булған өсөн дә.

Фильм беҙҙең яҡташыбыҙ тураһында һөйләй. Был туғанлыҡ хистәрен бигерәк тә фильмде А. Матросов исемендәге кино-театрҙа ҡарағанда ныҡыраҡ тояһың. Һәм һәр ваҡыт, картина барышында Сашаның Өфөнән булыуы тураһында әйтелгән урындарҙа, ҡараусылар, тулҡынланыуҙарынан тыйыла алмай, шатлыҡлы рәүештә гөүләп алалар.

Сеанс башланыуҙан элек, кешеләр әле фоэла саҡта уҡ Саша тураһында һүҙ башлайҙар. Шунда уҡ фильмда булмаған, ләкин уның Өфөнөң һәр бер кешеһенә туған һәм яҡын булған геройына ҡағылған төрлө ҡәмәләр һөйләйҙәр.

— Ысынлап та уның туғандары булмаған микән ни? — тип һорай йәшел береткалы урта мәктәп йәшендәге бер ҡыҙ.

Икенсе бер мөйөштә һоро күҙле ҡара ғына малай Матросовтың фронтта — башҡорт һалдаты Абдрахманов менән дуҫ булыуы тураһында һөйләй.

— Мин Сашаны тәрбиәләгән уҡытыусыһын беләм, — тип өҫтәй тулы кәүҙәле бер ханым.

Уйсан йөҙлө ҡыҙ күтәренкә тауыш менән:

— Ул яратҡан ҡыҙ бөтөнләй Маруся түгел, ә Лида исемле, — ти.

Уҡыусылар, элекке һалдаттар, эшселәр, ғалимдар — улар бөтәһе лә Ватанды данлаусы яҡташтарының бөйөк подвигын күрергә килгәндәр. Саша тураһындағы фильмға ҡыҙыҡһыныу бик ҙур.

Егерме йәшлек Александр Матросов үҙ тәне менән дошман дзотының амбразураһын ҡапланы. Уның подвиге менән йәш гвардиестарҙың героик эше араһында дөйөм үҙенсәлектәр бар. «Рядовой Александр Матросов» фильме Александр Матросов үҙенең подвиген ни өсөн һәм нисек яһаны, тигән һорауҙарға яуап бирә.

Ут һүнә. Күҙ алдына һуғыш йылдары картиналары килеп баҫа. Саша вокзалда үҙенең дуҫтары, тәрбиәселәре менән хушлаша. Ул теплушкала, үҙе менән бергә атакаға барасаҡ, бер котелоктан ашаясаҡ, уйҙарын бүлешәсәк иптәштәренә иғтибар менән ҡарай. Улар араһында, граждандар һуғышында Царицынды обороналауҙа ҡатнашҡан һалдат Чумаков Матросовтың хәтерендә тәрән урынлаша. Бына ошо кешеләр үҙҙәренең кәңәштәре, өлгөләре менән һалдат, Ватанды һаҡлаусы һүҙҙәренең ысын мәғәнәһен анларға ярҙам итеүсе вны тәрбиәселәргә әйләнделәр.

Сценарист Мдивани һәм режиссер Луков Саша образын «үҫешен» биреп дөрөҫ эшләгәндәр. Матросов фронт тормошоноң беренсе көндәренән үк, фронтҡа килгән һәр бер кеше кеүек үк, һалдат мәктәбен «әлефтәрҙән» башланы. Ул башҡаларҙан айырылмай, уның эштәрендә башлап һуғышҡа инеүселәргә характерле булған хәмәләр күп.

Саша хаталар ебәрә, ләкин ул быларҙан дөрөҫ һөҙөмтәгә килә белә. Был турала Матросовтың беренсе тапҡыр разведкала булыуы эпизоды асыҡ һөйләй. Саша, үҙенең тәжрибәһеҙлеге арҡаһында, сәнескеле тимер сыбыҡтарға урала, һәм, ауыр хәлдә ҡалып, үҙ-үҙен юғалта. Ҡурҡаҡ кеше паникаға бирелеп кире окоптарға йүгергән булыр ине, ләкин Саша башҡаса эшләй. Сәнескеле тимер сыбыҡтарҙан ҡотолғас, ҡыйыуланып алып, улар өҫтөнә гранаталар ташларға тотона. Быны, әлбиттә, дөрөҫ эшләне, тип үк әйтеп булмай, был үс алыу ғына булды. Ләкин Матросовтың оборонаһыҙ алғы һыҙығы менән булған был дуэле дошмандың иғтибарын үҙенә тартты һәм разведчиктарға боевой заданиене уңышлы башҡарырға ярҙам итте.

Фильмда айырыуса хәтерҙә ҡала торған бер нисә эпизод бар. Улар Сашаның йәтим бала алып ҡайтыуы, теплушкала партия йыйылышында һалдат Чумаковтың коммунистар партияһына алыныуы, Матросовтың командир блиндажындағы анты һәм, бигерәк тә, геройҙың Чернушки ауылы өсөн булған һуғыштағы батырлығы.

... Яланда дошман дзоты. Ул ротаның атакаға күтәрелеү кәрәген комасаулай. Ә был участкала дөйөм һөжүм бер нисә минуттан уҡ башланырға тейеш. Командир приказын үтәү өсөн Матросов алға шыуа.

Амбразурала пулемет уты сәселә. Немецтәр йөҙәрләгән үлем һибәләр. Йәш һалдат яҡыналайғандан-яҡыная. Бына алғы-артлы ике граната дзот өҫтөндә гөрһөлдәй, ләкин пулемет һаман эшләй бирә. Саша өсөнсө гранатаны ебәрә, ә пулемет ут һибеүен дауам итә. Ул һуңғы гранатаһын ырғыта, пулемет тына. Матросов автоматын баш өҫтөнә күтәрә лә:

— Алға! — тип ҡысҡыра.

Рота күтәрелә, ләкин, ошо моментте генә кеткәндәй немец пулеметы яңынан эшләй башлай. Ут иптәштәрҙе ҡурай. Сашаның күҙҙәре ҡеслә асыу менән янлар. Герой дзот ҡырына йүгереп бара ла кәүҙәһе менән амбразураны томалай. Рота алға китә.

... Кабинетта иптәш Сталин тора.

— Һеҙ, уға ун туғыҙ йәш тиһегеҙме? — тип һорай ул.

— Эйе, иптәш Сталин.

— Был, иптәш генерал, совет халҡының яңы быуыны — коммунизм өсөн көрәшселәр. Ундайҙар үлмәй, улар исеме беҙҙең героик халҡыбыҙ ағында мәңге йәшәр.

Өфө егете, Совет Армияһының бөтә һуғышсылары өсөн героизмдең өлгөһө булып торорлоҡ подвиг яһаны.

Артист А. Игнатьев Матросов ролен тәбиғи һәм ябай ғына һәм ролде башҡарыуҙың тик уңышы ла шунда ине. Артистар П. Константинов (Чумаков), О. Жаков (Щербин), М. Кузнецов (Колосов), Ш. Кзямов (Абдрахманов), К. Сорокин (Скворцов) иптәштәрҙең уйнауы Советтәр Союзы Геройы А. Матросовты сыныҡтырған фронт средаһын тәҙөй.

Һис шикһеҙ, был патриотик фильм Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тарафынан ҡайнар рәүештә ҡаршы алынасаҡ.

Һүрәттә: «Рядовой Александр Матросов» фильменән бер кадр.

Ә. Бикчәнтәев.

Бәләкәй фельетон

Дәүләкәндә таш юҡ...

Дәүләкән ҡала коммуналь хужалығы быйыл ҡала баҡсаһында танцылар майҙаны төҙөргә уйланы һәм, ныҡ булһын өсөн, уны таштан ҡорорға булды.

Ләкин ташты ҡайҙан алырға? Тауҙан соҡоп килтерергәме? Улай булһа, бик оҙаҡ була бит: ул ташты соҡоторға, ташытырға кәрәк, ә танца сезоны бына, бына башланырға тора.

Аҡыллы баштар уйланылар, уйланылар ҙа — әҙер таш таптылар. Каганович исемендәге колхоздың 1931 йылда таштан эшләткән теплицаһы бар бит! Баҡсаға йәнәш кенә тора. Алырға ла ҡуйырға!

Ҡемдәрҙер был фекергә ҡаршы төшөп ҡаранылар:

— Каганович исемендәге колхоз һәр йылды, шул теплицала үҫтереп, ҡала халҡын йөҙ меңдәрсә төп помидор, кәбеҫтә, ҡыяр рассадаһы һәм төрлө сәскәләр менән тәьмин итә бит! — тинеләр, улар.

Горкомхоз начальнигы иптәш Негаев:

— Рассада тип, йәштәрҙе танцанан мәхрүм ҡалдырып булмаҫ... Теплицаны боҙорға... ҡалаға беҙ хужа! — тине.

Әйтелгән һүҙ — эшләнгән эш! Теплицаның буйы 15, иңе 7 метр булған аҡ таш стенаһын һүттеләр ҙә, ташты ваҡланылар һәм танца майҙаны эшләтергә керештеләр. Ваҡ ташты төйгәсләп, төйгәсләп өйҙәләр һәм уның өҫтөнән цемент йәйеп ебәрҙеләр. Уға ҡаршы музыканттар өсөн урын әҙерләнде.

Беҙ танцамы, рассадамы кәрәклерәк икәне тураһында уйлаусыҙы уҡыусыларҙың ихтыярына ҡуйып, шуны ғына әйтәбеҙ: горкомхоз етәкселәре был эше менән колхозды һәр йыл килә торған йөҙ меңләгән доходтан, ә ҡала халҡын рассадаларҙан мәхрүм иттеләр.

Дөрөҫ, улар ныҡлы танца майҙаны яһаттылар — йөҙ йылдарға сыҙар. Ләкин ул цемент иҙәндә танцовать итергә теләүселәр күп табылырмы икән? Беҙҙенсә, унда танцовать итеүселәрҙең аяҡ кейемдәре лә таштан йәки цементтан булырға тейеш...

Тағы шуны әйтергә кәрәк: ҡала ерене горкомхоз хужа, уныһы дөрөҫ, ләкин ҙур бер колхоздың ҡаралтыһын боҙоп, уның материалын тартып алыу, йөҙ меңдәрсә һумлыҡ зыян килтереү хоҡуҡы бер кемгә лә, шул иҫәптән, Дәүләкән горкомхозы начальнигына лә бирелмәгәндер.

Дәүләкәндә таш юҡ, горкомхозда баш юҡ, күрәһең!..

Ғ. Ш.

Яңы уҡыу йылын ҡаршылауға

Ауырғазы районы. Ләкәнле ете йыллыҡ мәктәбе (директоры иптәш Ф. Сатликов) алдағы уҡыу йылына әҙерләкте март айынан уҡ башланы.

Утын әҙерләнеп, мәктәп эргәһенә ташылды. Өс класлыҡ бер бина ҡайтанан ҡоролдо. Тағы ла бер класс бүлмәһе һәм йылы коридор эшләнеү өҫтөндә. Уҡыусылар һәм ата-әсәләр мәктәпте әҙерләүҙә актив эшләйҙәр.

Мәктәп тирәһенә 300 төп урман һәм емеш ағастары ултыртылды.

Мәктәп алдағы йылда уҡыусыларға ҡайнар аш булдырыу өсөн үҙ участкаһына 0,50 гектар бойҙай, 1,50 гектар һоло, 1 гектар тары һәм 1 гектар арыш сәсте.

Киләһе уҡыу йылы өсөн 200 дана дәреслек һатып алынды.

Ш. Үтәев.

Күңелле ял

ЧЕРНИКОВСК. Быйыл йәш ҡаланың уҡыусылары йәйге каникулды күңелле үткәрәләр. Уҡыусылар июнь-июль айҙарында тыуған край буйынса сәйәхәткә китәләр. Улар Өфөлә, Красный ключтә, Белоретта һәм башҡа урындарҙа буласаҡтар.

Сәйхәт итеү осоронда уҡыусылар Төньяҡ Уралдың тәбиғәтен өйрәнәсәктәр, шулай уҡ Янган тауға барасаҡтар.

Алтынсы номерлы мәктәп уҡыусылары Черниковск — Өфө — Мәскәү — Ленинград — Өфө маршруты буйынса сәйхәт итәсәктәр.

Халыҡ-ара күҙәтеү

30 майҙа Чехословакияла парламентҡа булып үткән һайлауҙар Чехословакия демократияһына бик ҙур еңеү килтерҙе. 6,5 миллион тип әйтерлек һайлаусы, йәғни 90 проценте самаһы үҙҙәренең тауыштарын милли фронт исемлеге кандидаттарына бирҙеләр һәм һайлаусыларҙың тик 10,7 проценте генә, был исемлеккә риза булмағанлығын белгертеп, урналарға аҡ бюллетендәр төшөрҙө.

Был ысын мәғәнәһендә ирекле һайлауҙар булды. Был һайлауҙар ысын мәғәнәһендә демократик һайлау законы нигеҙендә үткәрелделәр. Хатта демократик Чехословакияның дуҫтары булмаған кешеләр ҙә ирекле һайлауҙарҙа ниндәй ҙә булһа боҙоуҙар булыуын билдәләй алманылар. Тауыш биреүҙең йәшеренлеге тулыһынса тәьмин ителде.

Чехословакияла булып үткән һайлауҙарҙың һөҙөмтәләре, ошо йылдың февралендә реакционерҙарҙың — сит ил империалистаре агенттәренең әләвеүҙәренә еңергес удар биргән һәм яңыртылған милли фронты халыҡтың күпселегенең яҡлағанлығын күрһәтәләр. Халыҡ һайлауҙарҙа үҙенең тауыш биреүе менән Готвальд хөкүмәте тарафынан үткәрелгән эске һәм тышҡы политика курсын яҡлағанлығын күрһәтте. Ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә милли фронт хөкүмәте бик ҙур экономик һәм социаль өлгәшеүҙәргә ирешә. Промышленность предприятиеләрен һәм 50-ән артыҡ эшсеһе булған башҡа предприятиеләрҙе национализациялау тураһында законлар ҡабул ителде. Хәҙер илдең бөтә промышленносеңең 90 проценте халыҡтыҡы. Яңы ер реформаһы һөҙөмтәһендә аҙ ерле крәҫтиәндәргә һәм батрактарға тағы 800 мең гектар ер бүлеп биреләсәк. Халыҡ массаларының башҡа күп кенә талаптары тормошҡа ашырылды. Ә ошо йылдың февраленә саҡлы был талаптар реакционерҙар тарафынан өҙәләп килде. Чехословакия демократияһының күреүеклә өлгәшеүҙәрен закон тәртибендә нығытҡан яңы конституция ҡылан ителде.

Яңыртылған милли фронттың илде тыныслыҡ һәм гөҙеллек юлынан, экономик һәм культура буйынса сәскә атыу юлынан алып барғанлығына Чехословакия халҡы ышанды. Бына ни өсөн ул һайлауҙарҙа милли фронт хөкүмәтенә тулыһынса ышанғанлығын һәм демократик ҡаҙаныштарҙы эске реакцияның, уның сит илдәрҙәге яҡлаусыларының һәм союзниктәренең мәкерле эҙләнеүҙәренән аҡларға әҙер икәнлеген белдерҙе.

* * *

Берлинда сыға торған «Берлинер цейтунг» газетаһы күптән түгел Бизония банкыларының һәм поштамттарының аҡса реформаһы буласағы тураһында йәшерен бойороҡ алыуҙары тураһында хәбәр баҫып сығарҙы. Был реформа июнь-дә буласаҡ тип уйлайҙар. Был «сара» Германия мәсьәләһендә Англия-Франция-Америка политикаһы звеноларының береһе булып тора. Ул Потсдам килешеүҙәренән баш тартыуҙы аңлата һәм Германияны бүлгеләүгә, көнбайыш Германия государствоһы төҙөүгә һәм был государствоны «көнбайыш блокҡа» индереүгә йүнәлдерелгән.

Германияла аҡса реформаһы тураһындағы мәсьәлә күп тапҡырҙар дүрт яҡлы һөйләшеүҙәр предметы булып торҙо. Берҙәм демократик Германия төҙөү политикаһын эҙлекле рәүештә яҡлаусы Советтар Союзы вәкилдәре берҙәм аҡса системаһын һаҡлауҙы һәм үҙәк немец финанс департаменты һәм эмиссион банк төҙөүҙе талап иттеләр. Улар Германияның айырым зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәреүгә әҙерләнеүҙе ғәйепләгән ҡарар ҡабул ителеүен талап иттеләр. Дүрт державаның сит ил эштәре министрҙәре Советы сессияларында, Контроль советында һәм финанс директоратында совет вәкилдәренең был талаптары Британия, Америка һәм Франция вәкилдәренең ҡаршылыҡтарына осранылар.

Контроль советтың ҡарары нигеҙендә аҡса реформаһы буйынса үҙ-ара килешелмәгән мәсьәләләрҙе тикшерергә тейеш булған финанс директораты Американың, Англияның контроль советындағы вәкилдәренең ғәйебе буйынса хатта йыйылманы ла.

Быларҙың барыһы көнбайыш оккупация державалары вәкилдәренең үҙ зоналарында реформаны сепаратный юл менән үткәрергә уйлағанлыҡтарын күрһәтте. Германияның көнбайыш зоналары өсөн Вашингтонда яңы аҡса знактары баҫылғанлығы үҙган йылдың аҙағында уҡ билдәле булғайны. Англия, АҠШ һәм Франция Германияны бүлгеләү һәм көнбайыш Германия государствоһы төҙөүгә иҫәп тотоп, Германияның бөтөнләгән тәьмин итеүҙең төп шарттарынан береһе булған берҙәм аҡса системаһын һаҡлауға ҡаршылыҡ күрһәтәләр. Был ҡарарҙы Потсдам килешеүен серьез рәүештә боҙоу тип баһалап, Германиялағы Совет хәрби миссияһы «Дүрт державаның да килешеп эшләнгән ҡарарҙары нигеҙендә бөтә Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреүҙе, элеккесә, ҡулланырға яраҡлы берҙән-бер юл тип иҫәпләй».

* * *

Иминселек совете үҙенең бер артлы үткәрелгән ултырышы Палестина мәсьәләһенә [illegible] ға һәм һәр тапҡырҙа ла төрлө ҡарарҙар ҡабул итеүенә ҡарамаҫтан, Палестинала һуғыш хәрәкәттәре дауам итә. Советтар Союзының иминселек Советындағы делегаттары Палестинала һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыуға һәм Палестина проблемаһын Генераль Ассамблея ҡарарҙары нигеҙендә хәл итеүгә килтереүе мөмкин булған резолюция тәҡдим итеүҙе яҡлайҙар.

22 майҙа Иминселек советы Палестиналағы хәлгә тыныслыҡты боҙоу булып тора тип хәрактеристика биргән резолюцияны ҡаҡты, ә уның урынына, Англия вәкиленең талап итеүе һәм Америка вәкиленең яҡлауы буйынса, Палестиналағы һәр ике тарафҡа һуғышты туҡтатыу тураһында [illegible] ҡаҙ бирергә тигән тәҡдим [illegible] мөрәжәғәт итеп сикләнде. [illegible] ле булғанынса, ғәрәп илдәре [illegible] тәҡдимде кире ҡаҡтылар.

СССР делегаты Громыко 29 майҙа, Иминселек советы, Палестиналағы хәлде тыныслыҡҡа [illegible] ныс тыуҙыра тип иҫәпләп, һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатырға [illegible] бирергә тейеш тигән тәҡдимде [illegible] дергәйне. Ләкин Британия [illegible] был тәҡдимде ҡабул итеүгә [illegible] нан ҡаршы килде. Америка [illegible] булған коллетаһының яҡлауы [illegible] Англия делегаты ярым-ярты [illegible] люция ҡабул ителеүенә [illegible]

Иптәш Громыко Англияның [illegible] золюцияһына ике йөҙлө, [illegible] политиканың яңы күренеше [illegible] характеристика бирҙе.

Ваҡиғаларҙың артабанғы [illegible] бындай баһаның гәҙеллеген [illegible] һатте. Ғәрәп илдәре һәм [illegible] государствоһы килешеү [illegible] саҡырыуҙы ҡабул иткәндән [illegible] ла Палестиналағы хәлде [illegible] һеҙ ҡалдырыр өсөн яңы [illegible] ҙар табылды.

Был ығы-зығыларҙың [illegible] Англияның Палестинаны ике [illegible] сударствоға — еврей һәм [illegible] государстволарына бүлеү, [illegible] тормошҡа ашырылырлыҡ [illegible] тип белдерергә һылтау алыр [illegible] ында һуғыш хәрәкәттәрен [illegible] тырға гүгел, ә дауам иттер[illegible] тырышҡанлығын күрһәтә.

Я. Маз[illegible]

БМО-ның ПАЛЕСТИНАЛАҒЫ ПОСЛАННИГЕ ПРИКАЗ[illegible]

ЛОНДОН, 4 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Амманнан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Берләшкән Милләттәр ойошмаһының Палестиналағы посреднигы Бернадотт 6 июнда 9 сәғәттән Палестинала һуғышты туҡтатыу һәм [illegible] ҙын 7 июнда Иерусалим [illegible] менән 18 сәғәттә кәсәнә [illegible] тураһында приказ бирҙе.

Совет-Финляндия договорын ратификациялау айҡанлы Хельсинкийҙә митинг

ХЕЛЬСИНКИ, 3 июнь. (ТАСС). Бөгөн Хельсинкиҙә Алиппла паркында күп кеше ҡатнашлығында митинг булды. Митингене дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында Совет-Финляндия договорын ратификациялау айҡанлы «Финляндия — Советтар Союзы» обществоһы йыйҙы. Митингелә хөкүмәт члендәре, Финляндияның демократик ойошмаларының вәкилдәре, шулай уҡ Совет миссияһы вәкилдәре ҡатнаштылар. Совет миссияһы члендәрен митингела ҡатнашыусылар айырыуса яғымлы ҡаршыланылар. Митинге булған майҙан Совет һәм Финляндия флагтары менән биҙәлгәйне.

Ҡотлау һүҙе менән «Финляндия — Советтар Союзы» обществоһының секретаре Бетти Пелтонен сығыш яһаны. Ул Совет-Финляндия договорының ҙур әһәмиәтен айырыуса ныҡлап билдәләне. Бөгөнтө байрамдың, — тине ул, — тарихи әһәмиәте бар. Финляндия менән Советтар Союзы араһындағы дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре хәҙер элек ҡасан да булһа булғанға ҡарағанда ныҡыраҡ. Пелтонен, договор Финляндия халҡының милли ынтылыштарына тулыһынса яуап бирә, тип билдәләне.

Премьер-министр Мауно Пеккала ҙур телмәр менән сығыш яһаны. Ратификацион грамоталар менән алышынғандан һуң договорҙың көсөнә ингәнлеген билдәләп, премьер-министр договорҙың Финляндия өсөн тышҡы политика яғынан ҙур әһәмиәте булғанлығын ныҡлап әйтте. Пеккала һөйләшеүҙәр ваҡытында һәр төрлө ялған фекерҙәр таратылғанлығын, ә хәҙер хөкүмәттең эске политикаһына ҡарата шундай уҡ ялған һүҙҙәр таратылыуын иҫкә төшөрҙө.

Унан ары премьер-министр Совет-Финляндия мөнәсәбәттәре тураһында һәм һуғыш алдынан Советтар Союзына ҡаршы алып барылған пропаганда тураһында хәтергә төшөрҙө.

Ике ил араһындағы ышанмаусылыҡты бөтөрөү тураһында Генералиссимус И. В. Сталиндең һүҙҙәрен иҫкә төшөрөп, Пеккала, был маҡсатҡа өлгәшеү өсөн Финляндия яғынан билдәле тырышлыҡтар талап ителә, тип ныҡлап билдәләне.

Премьер-министр Финляндия менән СССР араһында төҙөлгән Договор тураһындағы мәсьәләлә сеймдең ҡайһы бер кругтарының ҡылыҡтарын ғәйепләне һәм президенттең, хөкүмәттең был мәсьәләне ыңғай хәл итеүҙәрен билдәләне. Хөкүмәт реаль политика үткәрергә теләй. Сеймдең Договорға ҡаршы тауыш биргән 11 депутаты бының теләмәнеләр һәм быны аңламайҙар. Пеккала, политик аренала яңынан күренә башлаған иҫке йүнәлеш вәкилдәренә һайлауҙарҙа булышлыҡ һәм ышаныс күрһәтеп фин халҡы тағы хаталар яһарға тейеш түгел, тип ныҡлап әйтте.

СССР-ҙың беҙҙең илебеҙгә ҡарата булған яҡшы мөнәсәбәтенең, тине премьер-министр, дауам итәсәгенә мин ышанам. Бөгөн минә официаль рәүештә Советтар Союзының хәрби түләүҙәрҙе 1 июндән башлап 50 процентҡа кәметкәнлеген хәбәр иттеләр. Сеймдең банк вәкилдәре йыйылышында Советтар Союзының Финляндияға 5 миллион доллар суммаһында бик файҙалы заем бирергә әҙер булыуын белдергәнлеге тураһында хәбәр иттеләр.

Премьер-министрҙең был һүҙҙәре көслө алҡыштар һәм [illegible] тауыштары менән ҡаршы ал[illegible]

Һүҙенең аҙағында Пеккала хөкүмәт йүнәлешенең өлгәшеүҙә бәйләп бирҙе һәм һайлау алдынан рәшендәге зарарлы күренеш[illegible] мәҙәлән, социал-демократтар һәм аграрейҙарҙың хеҙмәттә[illegible] тураһында өс фракцияның [illegible] шеүенән баш тартыуҙарын [illegible] теп үтте. Премьер-министр килешеү бөтә фин халҡының [illegible] аль программаһы булып тора, ныҡлап әйтте. Программа [illegible] ляндия өсөн хәҙер ҙә актуаль [illegible] лып ҡала. Көрәш әле дауам [illegible] сөҡ, ләкин кемдең еңәсәге хаҡында шик юҡ.

Совет-Финляндия Договорының көсөнә инеүе айҡанлы Советтар Союзының Финляндиялағы [illegible] ланниге Г. М. Савоненков [illegible] нән СССР миссияһы совет[illegible] М. Л. Мухин ҡыҫҡаса [illegible] телмәре менән сығыш яһаны.

Аҙаҡтан митингела «Финляндия — Советтар Союзы» обществоһы председателе Скольвн-[illegible] Кильпи сығыш яһаны. Ул, [illegible] тамамланғандан һуң һәм яр[illegible] тураһында договор төҙөшкән һуң бөгөнгө байрам фин [illegible] тарихендә иң ҙур байрам [illegible] тора, тип билдәләне. Общество исеменән ул Финляндияға дуҫ[illegible] са мөнәсәбәт күрһәткән өсөн Генералиссимус И. В. Сталинға, совет халҡына рәхмәт бел[illegible] һәм Финляндия-Советтар С[illegible] дуҫлығы хөрмәтенә ете та[illegible] «ура» ҡысҡырҙы.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-[illegible] промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00772. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 113
8
июнь
шишәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Финляндия республикаһы президентенән Генералиссимус И. В. Сталинға телеграмма. (1-се бит).

Пар һөрөү планын тиҙерәк үтәү өсөн бөтә көстө тупларға! (1-се бит).

Советтәр Союзында. (1-се бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Ғ. Ахунов. — Ауыл Советы үҙенең эшендә активҡа таяна. (2-се бит).

Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығын лайыҡлы ҡаршылайыҡ! (2-се бит).

С. Әлибаев.—Ситтән тороп уҡыу эшен кисектермәҫтән яҡшыртырға. (2-се бит).

Ишембай — Ермолаевка тимер юлы — халыҡ төҙөлөшө. Трассаға ойошҡан рәүештә сығырға. (3-сө бит).

Н. Руднев. — Орлоҡ участкаларына — даими иғтибар. (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. Х. Әюпов.—Мал үрсетеүҙә зооветеринарияның яңы саралары. (3-сө бит).

Ҡ. Әхмәр. — Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре. (3—4-се биттәр).

Берлин комендаттары урынбаҫарҙарының ултырышында. (4-се бит).

Партия тормошонда һәр бер коммунистең актив ҡатнашыуына өлгәшергә

Большевиктәр партияһы — совет халҡының алдынғы, ойошҡан, юғары аңлы һәм монолиттай берҙәм отряды ул. Партия үҙ сафына халыҡ эше өсөн көрәштә һынатылған, саф выждандлы, кристалдай таҙа намыҫлы һәм ҡаты ихтыяр көсөнә эйә булған иң яҡшы кешеләрҙе берләштерә. Партия үҙенең һәр бер члененең активлеге, һәләтлеге, инициативалы булыуы менән көслө.

Коммунист — ғүмеренең һәр бер сәғәтен, һәр бер көнөн коммунизм төҙөү эшенә биреүсе ялҡынлы көрәшсе. Ул эшкә аңлы ҡараштә булыуҙың, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең, государство интересттәрен яҡлауҙың өлгөһөн күрһәтергә бурыслы.

Башҡортостан партия ойошмаһы 78 мең 886 ВКП(б) членен һәм кандидатын берләштерә. Был завод һәм фабрикаларҙа, колхоз һәм совхоздарҙа фидакәр хеҙмәт менән танылған, халыҡ ихтирамын һәм һөйөүен ҡаҙанған ғайәт ҙур көс.

Партия конференцияларынан һуң, партия тормошонда коммунистәрҙең активлеге айырыуса ныҡ үҫте. ВКП(б)-ның күп кенә район һәм ҡала комитеттәре партияның эске эштәрен көсәйтеү юлы менән коммунистәрҙең алдынғылыҡ ролдәрен күтәреүгә өлгәшттеләр. Быға миҫал итеп партияның Яҡауыл район ойошмаһын алырға мөмкин. Бында коммунистар эштең иң яуаплы һәм хәл иткес участкаларына урынлаштырылды. Бөтәһе 317 коммунист туранан-тура баҫыу эштәрендә ҡатнаша һәм, бер үк ваҡытта, колхозсылар араһында политик-массовый эш алып бара. «Коммунар» колхозында 22 коммунист бар. Партия ойошмаһы (секретаре иптәш Заманов) уларҙың һәр береһенә, дөйөм һәм политик белем кимәлен, индивидуаль һәләтле булыуын иҫәпкә алып, партия поручениеһы бирә. Кубейс агитатор булып эшләй. Иптәш Заманов һәр бер коммунистен тапшырылған эште еренә еткереп үтәүе һәм авангардлыҡ күрһәтеүе өсөн көрәшә. Яҙғы сәсеүҙең иң ҡыҙыу көндәрендә партия ойошмаһының икке йыйылышы булып үтте. Уларҙың беренсеһендә коммунистарҙың авангардлыҡ роле, икенсеһендә — иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәүҙә партия члендәренең һәм кандидаттарының бурыстары, тигән мәсьәләләр тикшерелде. Шулай итеп, партия ойошмаһы коммунистарҙың партия эшендә һәм политик тормошта актив ҡатнашыуҙарын тәьмин итә. Быны һөҙөмтәһе асыҡ: «Коммунар» колхозы иң көслө һәм алдынғы колхоз булып тора.

Партия-политик эште көсәйтеү, коммунистарҙың активлеген һәм авангардлыҡ ролен күтәреү арҡаһында Яҡауыл районы быйыл яҙғы сәсеүҙе, үткән йылға ҡарағанда, 13 мең гектарға арттырып, республикала икенсе булып тамамланы.

Ҡыҙғаныска ҡаршы, беҙҙә коммунистарҙың активлеген күтәреү тураһында тейешенсә хәстәрлек күрмәгән партия ойошмалары ла бар әле. Мәҫәлән, Ҡыйғы районының күп кенә тәүге партия ойошмаларында коммунистарҙың байтаҡ өлөшө партия тормошонда һәм общественный эштә актив ҡатнашыуға йәлеп ителмәгән. Бында партия ойошмаларының йыйылыштары регуляр рәүештә үткәрелмәй. Коммунистар партия ҡарары менән ваҡытында таныша һәм партия эшендә актив ҡатнаша алмайҙар. Был, коммунистарҙың политик үҫеүенә тоткарлыҡ яһай. «Коминтерн» колхозында (партия ойошмаһы секретаре иптәш Закирова) 11 коммунистең икеһе генә баҫыуҙа эшләй. Улар ҙа эштә авангардлыҡ роле күрһәтмәйҙәр. Тракторист Һидиәт Низамов смена нормаһын үтәй алмай. Уның машинаһы күп ваҡыт тик тора. Мәүли Низамов һәм Мусакалимов иптәштәрҙең баҫыуҙа булғандары ла юҡ. Колхозда политик-массовый эш бик насар тора. Шунлыҡтан, бында хеҙмәт дисциплинаһы бик түбән. Баҫыу эшендә эшкә яраҡлы колхозсыларҙың дүрттән бер өлөшө генә ҡатнаша.

Коммунист үҙе тырышып эшләһә генә уның һүҙе үтемле була. Хеҙмәттә шәхси өлгө күрһәткән коммунисҡа намыҫ менән эшләүҙең, норманы арттырып үтәүҙең, общественный милекте ныҡ һаҡлауҙың мөһимлегенә халыҡты ышандырыу ҙа еңел. Коммунист өсөн үҙенең яҡшы эшләүе генә лә етмәй әле. Ул бөтә заводтың, колхоз һәм совхоздың эше өсөн яуаплы. Шуға күрә коммунист большевистик тоғро һүҙ менән үҙенең артынан бөтә коллективте эйәртергә тейеш. Коммунистарға партия поручениеләре биреү һәм уларҙы производствоның яуаплы участкаларына урынлаштырыу юлы менән партия тормошонда һәм общественный эштә һәр бер коммунистең актив ҡатнашыуын тәьмин итеү — ул партия ойошмаһының мөһим бурысы булып тора.

Партияның эске эштәрен яҡшыртҡанда, партия демократияһын, тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡитләүҙе киң йәйелдереүҙә генә коммунистарҙың общественный һәм политик тормошта актив ҡатнашыуҙарын һәм уларҙың авангардлыҡ ролдәрен күтәреүгә өлгәшергә мөмкин. Шуның өсөн партия йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәрергә, илебеҙҙең эске һәм тышҡы хәле менән коммунистарҙы һәм улар аша массаны таныштырып торорға кәрәк. Коммунистар үҙе эшләгән учреждение һәм предприятиелә, колхоз һәм совхозда эштең торошон, партия ойошмаһының пландарын һәм бурыстарын һәр ваҡыт белеп торһон.

Партия поручениеләре биргәндә коммунистең дөйөм һәм политик белем кимәлен, уның шәхси һәләтле булыуын иҫәпкә алырға кәрәк. Шул саҡта ғына коммунисте партия эшенә дөрөҫ файҙаланырға һәм уға большевистик тәрбиә бирергә мөмкин.

Коммунистарҙы политик яҡтан тәрбиәләүгә айырыуса ныҡ иғтибар бирелергә тейеш. Марксистик-ленинсе теорияны ныҡлап үҙләштергәндә, политик яҡтан өлгөрөп еткәндә генә коммунист актив көрәшсе була ала.

Партия тормошонда һәм общественный-политик эштә һәр бер коммунистең актив ҡатнашыуына өлгәшеү юлы менән партия ойошмалары Башҡортостан большевиктәре алдында торған яңы бик ҙур бурыстарҙы, иптәш Сталинға яҙған хатта алынған үҙ һәм яуаплы йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәү өсөн бөтә көстө туплай аласаҡ.

Пар һөрөү планын тиҙерәк үтәү өсөн бөтә көстө тупларға!

Ойошҡанлыҡ юҡ

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Июнь айының тәүге биш көнлөгө инде үтеп китте, ә районда тик 8 колхоз ғына пар күтәреүгә башланы һәм ни бары 137 гектар ғына ер һөрөлдө.

Колхоз председателдәренең һәм хатта район етәкселәренең сәсеүҙе тамамлау менән тынысланыуҡа бирелеүҙәре пар һөрөү графигенең өҙөлөүенә килтерҙе. Ҡый үләндәренә, бигерәк тә ҡара һолоға ҡаршы көрәштә пар күтәреүҙең район өсөн айырыуса әһәмиәтле булыуы иҫтән сығарылды.

«Юшалы» колхозында сәсеүҙең тамамланыуына инде 4 көн үтеп китһә лә, бер генә гектар ҙа пар һөрөлмәгән. 31 майҙа уҡ сәсеүҙе тамамлаған «Балтаҡан», «Баш-Урал», «Красный Октябрь» һәм башҡа колхоздар пар һөрөүгә тик 6 июнда ғына төштөләр. «Ҡыҙыл маяҡ», «Үрнәк» һәм «Октябрь» колхоздарында ла пар күтәреү эше бик аҡрын бара.

Районда тракторҙар паркы ла пар һөрөүҙә тулы нагрузка менән эшләмәй. Колхоздарҙа сәсеү пландарын арттырып үтәгән тиҫтәләрсә бригадаларҙың тракторҙары хәҙер эштә ҡатнашмай. Учалы МТС-ында яғыулыҡ етешмәү арҡаһында тракторҙар көндәр буйына тик ултыралар. МТС директоры иптәш Дураков яғыулыҡ менән тәьмин итеү сараһын күрмәй. Шул арҡала быйыл 5 мең гектар майҙанда пар күтәрергә тейеш булған был МТС бөгөнгә көнгә тиклем ни бары 136 гектар ғына ер һөрҙө.

Район ауыл хужалығы бүлеге һәм колхоз етәкселәре районда пар күтәреү планының үтәлеүенә шикләнеп ҡарайҙар.

— Планды срогында үтәп булмаҫтыр, — тиҙәр колхоз председателдәре.

— Районда пар күтәреү эше насар бара, эш оҙаҡҡа һуҙылыр — ти район ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш Аллаяров. Башҡа работниктәр ҙа ошондай уҡ фекерҙә. Былар бөтәһе лә Учалы районында 1949 йылда арыштан юғары урожай алыу өсөн көрәштең ойошторолмауын күрһәтәләр.

М. Хәйҙәров.

Пландан тыш

ПЕТРОВСК. (Телефон аша). Беҙҙең колхоз 25 майға яҙғы сәсеү планын арттырып үтәп, бөтә көстө пар һөрөү эшенә күсерҙе. Был эште лә уңышлы башҡарып сығыу өсөн беҙ берҙәм эшләнек. 4 июнгә 62 гектар майҙанда пар күтәрелде, план 100 процентҡа үтәлде.

Ләкин беҙ быны менән генә сикләнмәйбеҙ. Быға тиклем файҙаланылмай ятҡан 30 гектар ерҙе парға һөрөп, бөтә һөрөнтө ерҙәрҙе үҙләштерәсәкбеҙ. Арыш сәсеүҙән артҡан майҙан киләһе йылғы һабан ашлығы өсөн ҡара пар булып ҡаласаҡ һәм тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн ярҙам итәсәк.

Үткән йыл сәселгән арыштың күренеше бик әйбәт. Беҙ уға яҙ көнө яҡшы тәрбиә ойоштороҡ. Һәр бер гектарҙан 30-ар центнер урожай алыу өсөн көрәш алып барабыҙ.

Ш. Сәғиров,

Маҡар районы «Игенсеглар» колхозы председателе.

---☆---

Ҡыйғыла ашыҡмайҙар

ҮРГЕ ҠЫЙҒЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Тракторҙар паркының баҫыу эштәрендә сиктән тыш насар файҙаланылыуы һөҙөмтәһендә быйыл районда сәсеү бик оҙаҡҡа һуҙылды. 20 колхоз ошо көнгә тиклем сәсеүҙе тамамламаған әле.

МТС етәкселәренең колхоздар менән төҙөшкән договорҙарҙы үтәүгә яуапһыҙ ҡарауҙары, машиналарҙың тик тороуҙарын бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрмәүҙәре пар һөрөү эштәрен дә өҙөүгә килтерҙе. 16 колхоз бөгөнгө көнгә тиклем пар һөрөүгә башламаған. График буйынса май айының өсөнсө ун көнлөгөндә һәм июнь айының тәүге ун көнлөгөндә 9.800 гектар майҙанда пар һөрөлергә тейеш ине. 5 июнгә ни бары 1.184 гектар ғына пар күтәрелде.

Ҡыйғы МТС-ында 50 трактырҙың 22-һе эшләмәй ултыра. Күпселек трактористар смена нормаларын үтәмәйҙәр, 15 көн буйына график буйынса тракторҙар менән 3000 гектар урынына, ни бары 392 гектар ер һөрөлдө. МТС директоры Фәхретдинов һәм уның политик эштәр буйынса урынбаҫары Тихомиров иптәштәр колхоздарҙа гастроллек итеп кенә йөрөйҙәр. Трактор бригадаларында бер нисә минут булып, колхоз председателдәренең, трактор бригадаһы бригадирҙарының машиналарҙың йыш ватылыуы тураһында һөйләгән зарҙарын тыңлайҙар ҙа, эште яҡшыртырға вәғәҙәләр биреп ҡайтып китәләр һәм шунда уҡ биргән вәғәҙәләре тураһында онотыалар. «8 март» колхозында «НАТИ» тракторы аҙнанан бирле тик ултыра. Иптәш Фәхретдинов колхозға килеп, икенсе трактор ебәрергә вәғәҙә итте лә, шуның менән эш бөттө.

«Верный путь» колхозында 4 тракторҙың береһе лә пар күтәреүгә башламаған. Бында «НАТИ» тракторы 7 көндә бары 6 гектар ер һөргән. Трактор бригадаһы бригадиры МТС-ҡа ватыҡ частәр ташыуҙан бушамай. МТС етәкселәре һәм механиктәре әле лә был бригадаға техник ярҙам күрһәтеүҙе кәрәкле тапмайҙар. Колхоз председателе иптәш Рязанов сәсеүҙән һуң «ял итеү» ойоштороҙо.

— Аттарға һәм колхозсыларға аҙыраҡ ял бирергә булдыҡ. Пар һөрөргә өлгөрөрбеҙ әле, көҙгә тиклем бик күп ваҡыт бар, — ти ул. 20 майҙан уҡ 10 һабанды пар күтәреүгә ҡушырға мөмкин ине. Ләкин 5 июнгә тиклем бер генә һабан да бүленмәне. Колхоз етәкселәре пар һөрөүҙе һуҙлатыу бик күп урожайҙы юғалтыуға алып барыуын аңларға теләмәйҙәр.

«Память Ильича» колхозында ла был эшкә бик һүнлап башланылар. Трактор менән ни бары 74 гектар майҙанда пар ере эшкәртелде. Һуңғы аҙнала был эш бөтөнләй туҡтатылды. Киров, Сталин, Салауат исемендәге колхоздарҙа ла эш темпы бик түбән.

Пар һөрөү графигенең өҙөлөүе, машиналарҙың һәм йәнле тартыу көстәренең был эштә тулыһынса файҙаланылмауы район ауыл хужалығы бүлеге етәкселәрен һис тә борсомай.

Н. Ғәлимов.

Яҙғы сәсеүҙә райондар ярышы

(план үтәлеше 1948 йылдың 5 июненә, процентттарҙа).

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Сәселгән	Һөрөлгә
1.	Туймазы	102,0	105
2.	Балтач	100,5	101
3.	Дыуан	100,3	115
4.	Яҡауыл	100,3	94
5.	Баймаҡ	100,2	117
6.	Благовещен	100,1	100
7.	Ҡандра	100,0	101
8.	Салауат	100,0	113
9.	Тәтешле	99,6	99
10.	Белорет	99,1	146
11.	Покровка	98,6	106
12.	Өфө	98,6	101
13.	Дәүләкән	97,8	102
14.	Белоҡатай	97,3	116
15.	Бөрө	96,9	91
16.	Краснокам	96,9	103
17.	Бүздәк	96,0	97
18.	Борай	95,0	94
19.	Мәсетле	95,0	106
20.	Стәрлетамаҡ	94,9	104
21.	Бозаяз	94,4	94
22.	Асҡын	94,3	91
23.	Благовар	94,1	99
24.	Миәкә	94,1	98
25.	Ҡалтасы	93,6	92
26.	Байҡыбаш	93,5	96
27.	Әлшәй	93,3	92
28.	Учалы	93,0	128
29.	Кушнаренко	92,6	88
30.	Мишкә	92,5	90
31.	Матрай	92,5	99
32.	Шаран	92,4	86
33.	Баҡалы	92,2	82
34.	Әбйәлил	91,6	106
35.	Ҡариҙел	91,1	132
36.	Ауырғазы	91,0	88
37.	Нуриман	91,0	89
38.	Шишмә	91,0	91
39.	Ҡырмыҫҡалы	90,6	88
40.	Иглин	90,0	89
41.	Стәрлебаш	90,0	90
42.	Хәйбулла	89,0	102
43.	Ғафури	88,1	86
44.	Ҡыйғы	88,0	132
45.	Федоровка	87,8	82
46.	Оло-Тиләк	87,0	85
47.	Маҡар	86,8	88
48.	Дүртөйлө	86,0	85
49.	Илеш	85,3	85
50.	Бәләбәй	85,1	76
51.	Саҡмағош	85,0	84
52.	Йомағужа	84,8	81
53.	Йәрмәкәй	84,7	86
54.	Көйөргәҙе	83,0	87
55.	Бишбүләк	82,6	85
56.	Бөрйән	82,6	87
57.	Абзан	82,0	84
58.	Архангель	82,0	58
59.	Мәләүез	80,0	80
60.	Күгәрсен	80,0	79
61.	Воскресен	79,0	80
62.	Йылайыр	76,9	73
63.	Зиянчура	75,1	72

Совет Социалистик Республикалар Союзының Министрҙәр Советы Председателе

Генералиссимус Иосиф Виссарионович СТАЛИНҒА

Мәскәү

Киң күңеллелек һәм йомартлыҡ күрһәтеп, Финляндияның репарация бурыстарын байтаҡ кәметергә ҡарар иткән өсөн, Генералиссимус әфәндә, Һеҙҙән, һәм Совет Хөкүмәтенән фин халҡының, шулай итеп, минең үҙемдең тәрән һәм үҫеп йөрәктән сыҡҡан рәхмәтемде ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Финляндия республикаһы президенте И. К. Паасикиви.

Хроника

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш Борис Павлович Бещевте Юл эштәре министры итеп билдәләне.

* * *

СССР Верховный Советы Президиумы иптәш И. В. Ковалевте, башҡа эшкә күсеүе сәбәпле, Юл эштәре министре вазифаһынан бушатты.

Советтәр Союзында

◆ ◆ ◆

Иген тейәгән ҡыҙыл ылауҙар

АШХАБАД. (ТАСС). 1 июнда иртә менән, бөтә ауылдарҙан автомашиналар, дөйәләр, яңы урожай игенен тейәп иген әҙерләү пункттарына бара торған юлдар буйлап, ағылдылар. Ҡыҙыл ылауҙарҙың байраҡтары лозунгылары елферҙәй.

Ауылда китап

Краснояр крайы, Емельяновск районының «Украинец» колхозы матур итеп культура йорто һалды һәм библиотека төҙөнө. Шулай уҡ Сталин исемендәге, «Завет Ильича» һәм Карл Маркс исемендәге һәм крайҙағы райондарҙың башҡа колхоздарында ла ҙур библиотекалар төҙөлдө.

Юғары урожай мастерҙарынан 180 кеше почта аша художество, политик, ауыл хужалығы әҙәбиәте алалар. Шуның менән бер рәттән күп кенә ауыл хужалығы новаторҙары үҙҙәре бер нисә брошюра яҙҙылар. Улар был брошюраларҙа юғары урожай алыу буйынса үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлашалар.

Свердловск колхоздарында 7 мең электр моторҙары

Свердловск өлкәһе колхоздарында 7 мең самаһы төрлө электр моторҙары иҫәпләнә. Был — һәр бер колхозға 3-4 мотор тура килә тигән һүҙ. Колхоз хужалығында электр энергияһы киң ҡулланыла. Ачинск районының «Заря» ауыл хужалығы артелендә хәрәкәт итеүсе 78 электр моторы бар.

Рус батырҙарының финаль ярышы тамамланды

ВЛАДИМИР. (ТАСС). Бында рус батырҙарының өс көн буйына дауам иткән Бөтә Союз конкурсының финаль ярышы тамамланды. Союздар Йортонда ярыштың йомғағы яһалды.

РСФСР Министрҙар Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт эштәре комитетының вәкиле иптәш Такаев конкурста еңеп сығыусыларға ҡиммәтле бүләктәр тапшырҙы. Беренсе урын алыусы батырҙарҙың Мәскәү командаһына беренсе дәрәжәләге диплом һәм хрусталь кубок тапшырылды.

Ярыштың баш судьяһы, спорттың атҡаҙанған мастеры А. В. Бухаров ТАСС хәбәрсеһе менән булған беседала түбәндәгеләрҙе хәбәр итте:

— Конкурстың финаль ярышы алдынан РСФСР-ҙың бөтә райондарында, ҡалаларында, өлкәләрендә батырҙар ярышы үткәрелде. Унда 3,5 миллион кеше ҡатнашты.

Конкурстың финалендә, РСФСР-ҙың төрлө райондарынан, барлығы 29 команда ҡатнашты. Команда беренселеген Мәскәү өлкәһенең батырҙары командаһы, икенсе урынды — Новгородлылар алды.



Төрөкмән ССР-ы. Ашхабад һәм Марый өлкәләрендә арпаны массовый йыйыу башланды. Комбайндар мул урожайҙы йыйырға сыҡтылар.

Һүрәттә: Ашхабад районы, Свердлов исемендәге колхозда комбайн менән арпа йыйыу.

К. Томашевский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Заводта комбайнерҙар курсы

Красноярск комбайндар заводы коллективы ауыл механизаторҙарына ҙур ярҙам күрһәтә. Ул үҙгән йылдан бирле колхоз баҫыуҙарына үҙе йөрөй торған комбайндар ебәрә. Ағымдағы йылда комбайн төҙөүселәр коллективы заводта комбайнерҙар курсы ойошторҙо. Курстарға ебәрелгән колхозсылар менән занятиеларҙы заводтың инженерҙары һәм конструкторҙары үткәрәләр. Инженерҙар техниканы идара итеү һәм үҙе йөрөй торған комбайндарҙы тәрбиәләүҙән тыш, курсанттарҙы МТС һәм совхоз мастерскойҙарында ҡулланырға мөмкин булған алдынғы завод технологияһы менән таныштыралар.

„Бригада көнө“

Измаил өлкәһе Калийск районының Хрущев исемендәге колхозында яҙғы сәсеү башланғандан уҡ регуляр рәүештә аҙнаға бер тапҡыр «бригада көнө» үткәрелә. Был көндө колхозсылар звеноводтарҙың һәм бригадирҙарҙың отчеттарын тикшерәләр, социалистик ярышҡа йомғаҡ яһайҙар. «Бригада көнө» үткәргән саҡта тәжрибәләр менән киң күләмдә уртаҡлашыу бөтә колхозсылар тарафынан тип әйтерлек көндәлек нормаларҙы систематик рәүештә арттырып үтәүҙе тәьмин итте. Өлкә ойошмаларҙың ҡарары буйынса «бригада көндәре» өлкәнең бөтә колхоздарында ла үткәреләсәк.

(ТАСС).

Совет төҙөлөшө

Ауыл Советы үҙенең эшендә активҡа таяна

Урындағы Советтарға һайлауҙарҙа Яңауыл районының Айбүләк ауыл Советына 23 депутат һайланды. Уларҙың күбеһе йәш депутаттар — государство власе менән етәкселек итеү эшенә беренсе тапҡыр килделәр. Ауыл Советында өҙлөкһөҙ 11 йыл буйына председатель булып эшләп килгән иптәш Ғилметдинов йәш депутаттарға практик эштә ярҙам кәрәк икәнлеген бик яҡшы аңлай һәм уларҙы эшкә өйрәтә, үҙенең бай тәжрибәһе менән уртаҡлаша.

Иптәш Ғилметдинов бөтә депутаттарҙы эш участкаларына билдәләгән. Һәм уларға бөтәһе 65 актив беркеткән. Депутаттар бөтә хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәрен үҙ контролдәренә алғандар, улар урында Совет закондарын боҙоуға, граждандарҙың хоҡуҡтарын айырым кешеләр йәки ойошмалар тарафынан ситлатеүгә юл ҡуймайҙар, партия һәм хөкүмәттең ҡарарҙарын аныҡ итеп үтәү өсөн киң массаны мобилизовать итәләр.

Был ауыл Советына ҡараған биш колхоз да ауыл хужалығы даими хәрәкәт итеүсе комиссияһының контроле һәм практик ярҙамы арҡаһында яҙғы сәсеүгә ҙур әҙерлек менән тошкәйнеләр. Колхозсыларҙың күтәренке рух менән үҙ-ара ярышып эшләүҙәре һөҙөмтәһендә сәсеү үткән йылғыға сағыштырғанда 10 көнгә алдан — 13 майға тамамланды. Хәҙер колхоздар пар һөрәләр, ашлыҡтарҙы утайҙар һәм өҫтәмә аҙыҡландыралар.

Партия ойошмаһының билдәләүе буйынса күп депутаттар колхозсылар араһында агитатор булып эшләйҙәр. Улар киң массаны удар эшкә мобилизовать итеү менән бергә үҙҙәре баҫыу эштәрендә хеҙмәттең гүзәл өлгөләрен күрһәтәләр. Мәҫәлән, депутат иптәш Хилазева Раузә сәскес машинаһы менән норма буйынса 4,5 гектар урынына көн һайын 9,7 гектар сәсеп килде. Звеновод иптәш Хазбуллатова Раулнә 10 гектар урынына 15 гектар арышҡа ике тапҡыр өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙе. «Азат» колхозының председателе иптәш Шакиров сәсеүҙе ауыл Советы күләмендә беренсе булып тамамлауҙы тәьмин итте.

Финанс һәм бюджет комиссияһының председателе депутат иптәш Исмәғилов эште планлы рәүештә алып бара. Комиссия члендәренең актив ҡатнашлығында план төҙөй, ултырыштарҙы йыш ҡына уҙғара, унда аҡса туплау һәм бюджет үтәлешен тәьмин итеү сараларын билдәләйҙәр. Иптәш Исмәғилов аҡса туплау эшенең барышын һәм бюджеттең үтәлешен сессияларға ҡуя. Комиссия члендәренең үҙ тирәләренә финанс активын туплап, ныҡышмалы рәүештә эшләүҙәре арҡаһында 1947 йылда аҡса туплау планы 133 процентҡа, 1948 йылдың I квартал планы 170, II квартал планы 100 процентҡа үтәлде.

Ауыл Советы ауылды төҙөкләндереү һәм халыҡтың көн-күрешен яҡшыртыу эшенә ҙур иғтибар бирә. Үткән йыл 4 күпер төҙөлдө. Ватан һуғышында һәләк булған воиндарҙың семьяларына, Ватан һуғышы инвалидтарына практик ярҙам итеү маҡсатында 13 яңы йорт һалынып бирелде, 10 йортҡа капиталь ремонт үткәрелде, яңынан 8 аҙбар төҙөлдө, 31 аҙбарға ремонт үткәрелде һәм башҡа төрлө материаль ярҙамдар күрһәтелде. Даими хәрәкәт итеүсе комиссияның (председателе иптәш Микишев) инициативаһында оло юлдарҙың тирәләрендәге канауҙар таҙартылды, ауыл урамдарына һәм колхозсыларҙың йорттары эргәһенә ағастар ултыртылды. Медпунктҡа, мәктәптәргә 5 мең һумлыҡ ремонт үткәрелде һәм уларға етерлек тиклем утын әҙерләнде.

Культура-ағартыу комиссияһы (председателе иптәш Ғәрипов) айырыуса яҡшы эшләй. Колхоз клубтарында үҙэшмәкәр драма һәм хор түңәрәктәре ойошторолған, улар сәсеү осоронда колхозсылар өсөн 4 постановка ҡуйҙылар һәм 7 тапҡыр концерт бирҙеләр. Агроном иптәш Ямалов етәкселегендә агротехник түңәрәктәре эшләп килә.

Бына был уңыштарға ауыл Советы хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәренә бөтә депутаттарҙы, шулай уҡ ауыл активын яҡындан ылыҡтырыуы арҡаһында өлгәшә.

Г. Ахунов.

Заем конверсияһы ойошҡан рәүештә башланды

Маҡар районының колхоз һәм совхоздарында, МТС, предприятие һәм учреждениеларында иҫке заем облигацияларын яңы — 1948 йылғы, 2 процентлы заем облигацияларына алмаштырыу эше ойошҡан рәүештә башланды.

Район үҙәге хеҙмәтсәндәре тәүге ике көн эсендә генә алмаштырыу пункттарына иҫке заем облигацияларын тапшырып, 200 мең һумлыҡ яңы заем облигациялары алдылар.

Район финанс бүлеге һәм государство банкыһы эргәһендәге пункттар үҙҙәренең эштәрен айырыуса яҡшы ойошторғандар. Был пункттарҙа иҫке заем облигацияларын яңы заем облигацияларына алмаштырыуҙан алда элекке отош таблицалары менән тикшерелә һәм отош аҡсалары шунда уҡ түләнә.

С. Сафин

Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығын достоин ҡаршылайыҡ!

Йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә

СТӘРЛЕТАМАҠ, (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Ҡаланың күп кенә предприятиеларының коллективтәре хәл иткес йыл программаһын үтәүҙә арымай-талмай эшләйҙәр. «Башнефть» берекмәһенең заводы эшселәре ошондай коллективтәрҙең береһе булып тора. Коллективтең стахановсы эше биш айҙа ярты йыллыҡ планды 108 процентҡа үтәүҙе тәьмин итте. Бөтә эшселәр ҙә норманы арттырып үтәйҙәр Ә Зуев, Шишкин иптәштәр биш айҙа йыллыҡ норманы үтәнеләр.

«Красный пролетарий» машиналар төҙөү заводы, ит комбинаты коллективтәре лә беренсе июнгә ярты йыллыҡ планды үтәнеләр. Ит комбинатында пландан тыш бирелгән продукция 81 мең һумлыҡ тәшкил итте.

Йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә эшләгән алты предприятие коллективе йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәү йөкләмәһен алып, ҡалалағы бөтә предприятиеларҙың эшселәрен, инженер-техник работниктарын һәм хеҙмәткәрҙәрен байрам алды ярышына саҡырып мөрәжәғәт итте.

Ғ. Ибраһимов.

Өфө еп иләү фабрикаһының иң яҡшы ватерщицаһы, комсомолка М. Басирова бер үҙе 528 орсоҡ хеҙмәтләндерә, нормаһын 200 процентҡа еткереп үтәй.

Һүрәттә: Иптәш М. Басирова эш өҫтөндә.

Л. Яҡубов фотоһы.

Прокатсылар — ярыш инициаторҙары

— Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығын достоин ҡаршылау өсөн!

Май айында иң яҡшы производство күрһәткестәрен биргән прокат цехы коллективы [illegible] Белорет металлургтары араһында байрам алды ярышын башлап ебәреүсе булды.

Прокатсыларҙың инициативаһын домнасылар, мартенсылар, Тирлән прокатсылары, комбинаттың тимер юлсылары тарафынан ҡайнар хупланы. Мартенсылар беренсе кварталдағы [illegible] ҡаплау һәм юғары сифатлы [illegible] планын бөтә ассортимент буйынса срогынан алда үтәү буйынса [illegible]. Май айы планын 106 процентҡа үтәгән тимер юлсылар [illegible] йөкләмәһен алдылар.

Үткән айҙа сүйын, [illegible], прокат етештереү, йөк әйләнеше планын арттырып үтәгән Белорет металлургтары бөйөк байрам алды ярышында хеҙмәттә яңы еңеүҙәргә өлгәшеү өсөн ҙур мөмкинлектәргә эйә.

АЛДЫҢҒЫ ЦЕХ

Черниковск машиналар төҙөү заводының начальнигы иптәш Большаков булған цех коллективе май айы программаһын срогынан алда арттырып үтәне. Цехта май айы планын беренсе булып Иванов, Коломасов, Баранов иптәштәр етәкселегендәге группалар тамамланылар.

Цех коллективе үҙенә бирелгән производство пландарын систематик үтәп килеүе, ойошҡан эшләүе менән бөтә заводта дан ала. Ул социалистик ярышта алдыңғы сафта бара.

Д. Виноградов.

Һүҙебеҙ эшебеҙҙән айырылмай

— Хөкүмәттең юғары наградаһына стахановсы эш менән яуап бирербеҙ...

Нефть эшкәртеүселәр үҙҙәренең заводын Ленин ордены менән наградлау айҡанлы уҙғарылған митингыла шулай тигәйнеләр.

Һәр ваҡыттағы кеүек беҙҙең һүҙебеҙ эшебеҙҙән айырылманы. Бөйөк награда менән рухланған нефть эшкәртеүселәр май айында айырыуса күтәренке темп менән эшләнеләр. Әгәр үткән биш айҙа пландың үтәлеше уртаса 101,5 процент булһа, май айында ул 109,4 процентҡа етте. Был Тыуған илебеҙгә халыҡ хужалығына пландан тыш меңдәрсә тонна бензин һәм башҡа төр яғыулыҡ тигән һүҙ.

Өлгәшелгән уңыштар бөтә коллективтың ныҡышмалы хеҙмәте менән яулап алынды. Беҙҙә төп цехтарҙың коллективтәре лә, шулай уҡ ярҙамсы цехтарҙың коллективтәре лә стахановсыларса эшләйҙәр. [illegible]

Гершгейн, Кадышев һәм Ежов иптәштәр етәкселек иткән цехтар заводта төп цехтар булып торалар. Был цехтарҙың коллективтәре май айында Ленин орденле заводтың исеменә лайыҡлы темп менән эшләнеләр. [illegible] ике цехта план 111,5 процентҡа үтәлде. Заводтың [illegible] цехтары өсөн был юғары күрһәткес. Ә Гершгейн цехының Әләмәев, Бикметов иптәштәр етәкселек иткән бригадалар заводта иң алдыңғы урынды алдылар. Ленин орденле иптәш Ежов етәкселек иткән цех коллективе лә бөйөк награданы стахановсы хеҙмәт менән аҡлай. Бында Имаметдинов, Черненко иптәштәр етәкселек иткән бригадалар пландан тыш тиҫтәләрсә тонна яғыулыҡ биралар.

Төп цехтарҙың уңышында ярҙамсы цехтарҙың өлгәле эштәре ҙур роль уйнай. Начальнигы иптәш Лаврентьев булған цех установкаларҙы ремонтлау эшен башҡара. Был цех коллективенең хеҙмәтте, эш урынын өлгәле ойоштороу установкаларҙы срогынан алда ремонтлауҙы тәьмин итте. Айлыҡ планды 157 процентҡа үтәү цех коллективенең стахановсы эшен, төп цехтарҙың уңышлы эшләүенә [illegible] асыҡ күрһәтеп тора. [illegible] цехтарҙың коллективтәре лә хөкүмәттең юғары наградаһына айлыҡ планды 125—145 процентҡа үтәп яуап бирҙеләр. Был күрһәткестәр заводтың дөйөм уңышында үҙҙәренең ролен уйнамай ҡалманы.

Беҙ планды бөтә экономик күрһәткестәр буйынса үтәү өсөн көрәшәбеҙ. Үткән дүрт айҙа продукцияның үҙенә төшөү хаҡы 5,1 процентҡа кәметелде. Электр энергияһына, яғыулыҡҡа экономия [illegible] пландан артып үтәлде, установкаларҙы ремонтлау срогы 10,4 процентҡа ҡыҫҡартылды. Дүрт айҙа рационализатор тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыуҙан 153 мең һум экономия алынды.

Май айындағы эш һөҙөмтәләре беҙҙә Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығына үтәргә нигеҙлек тыуҙыра. Һәм Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективе хәл иткес йыл планын бөйөк дата көнөнә үтәү өсөн көрәшә.

Н. Дауытов.

Операторҙарҙың квалификацияларын күтәрергә

Нефть промышленносендә минең йәш эшсе. Бынан ике йыл элек кенә армия сафынан ҡайтып, эшләй башланым. Был йылдар эсендә республикабыҙҙың йәш нефть промыселенең танымаҫлыҡ булып үҫеүе миндә ҙур ғорурлыҡ тыуҙырҙы, һәм мин нефтселәр сафына баҫтым.

Эшкә башлағас та промысел эше техникаһын нисек тә булһа тиҙерәк үҙләштереү өсөн бөтә көсөмдә һәм энергиямды һалдым. Тырышлыҡ арҡаһында теләгемә ирештем. Хәҙер алтынсы участкала үҙ алдыма оператор булып эшләйем һәм скважинаны ремонтлау менән бәйләнешле ҡатмарлы эштәрҙе башҡарам.

Скребтарҙы күтәреү-төшөрөү эшенә эйә булыу менән бер рәттән мин штуцерҙарҙы асырға һәм ябырға ла, скважиналарҙың арматураларын таҙартыу эштәрен башҡарыуға ла өйрәндем. Слесарлеҡ, балта оҫтаһы эштәрен өйрәндем, электр техникаһын үҙләштерҙем.

Быларҙың бөтәһе лә миңә скважиналарҙағы теләгән бер дефекте үҙ алдыма бөтәрә алыуға мөмкинлек бирҙе. Шуны әйтергә кәрәк, беҙҙең күп кенә операторҙар үҙҙәренең бөтә яҡтан әҙерлекле булыуҙарына өлгәшеү өсөн иғтибар бирип еткермәйҙәр әле. Промысел етәкселәре лә улар алдына ошондай талаптарҙы ҡуймайҙар. [illegible]

З. Хеснетдинов,

«Туймазынефть» тресы [illegible] промыселдең өлкән операторы.

Срогынан бер ай алда

Башметаллопромсоюз системаһының Өфө ҡалаһындағы «Металлист» артеле коллективе был йылдың дүрт айында [illegible] социалистик ярышта юғары темп менән эшләй. Намыҫлы хеҙмәт [illegible] ярты йыл өсөн алынған пландарын срогынан бер айға алда арттырып үтәне һәм пландан тыш [illegible] тонна кара ҡалайҙан төрлө һауыт-һаба эшләп сығарҙы.

Стахановсылар Бибин, Шаренов, Парфенов, Акимова иптәштәр һәр сменала ике-өс норма бирәләр. Артелдә хәҙер аллюмин һауыт-һабалар етештереү үҙләштерелде.

Артель члендәре йыллыҡ производство пландарын Бөйөк Октябрь байрамы көнөнә үтәү өсөн ярышалар.

Р. Сафин.

Ситтән тороп уҡыу эшен кискерменәстән яҡшыртырға

Республикабыҙҙың мәктәптәрендә 22.945 уҡытыусы бар. Уларҙан тик 12 меңдән артығырағы ғына тулы белемле. Ҡалғандары белемдәре яғынан үҙҙәренә ҡуйылған талаптарға яуап бирерлек түгел.

Бындай уҡытыусыларҙың белемен тулыландырыу өсөн педучилищеларҙа, уҡытыусылар институттарында һәм пединститутта ситтән тороп уҡыу системаһында белем биреү бурысы партия һәм хөкүмәт ҡарарҙары менән күптән билдәләнгәйне.

СССР Совнаркомының 1943 йыл 31 декабрҙә сығарылған ҡарары буйынса, I—IV класс уҡытыусылары 1946 йыл 1 августҡа, V—VII класс уҡытыусылары 1947 йыл 1 августҡа, VIII—X класс уҡытыусылары 1948 йыл 1 августҡа тиклем ситтән тороп уҡып, үҙҙәренең квалификацияларын тулыландырырға тейештәр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мөһим һәм яуаплы бурыс беҙҙең республикала срогында үтәлмәне генә түгел, бәлки уны ғәмәлгә ашырыу өсөн тейешле саралар ҙа ныҡлы күрелмәне һәм уҡытыусыларҙың регуляр уҡыуҙары яҡшылап ойошторолманы. Был хәл күп кенә мәғариф органдары һәм мәктәп директорҙарының тәфү ителмәҫлек ғәмһеҙлектәре һөҙөмтәһендә килеп тыуҙы. Башланғыс мәктәптәрҙә бөтәһе 5139 уҡытыусының белеме етерлек түгел. Шуға ҡарамаҫтан, уларҙан 4415 кеше генә ситтән тороп уҡыусы булып иҫәпләнә. Ә ете йыллыҡ һәм урта мәктәптәрҙәге етерлек белеме булмаған уҡытыусыларҙың ситтән тороп уҡыуы бынан да насарыраҡ тора. Был хәл уҡытыусыларҙы ситтән тороп уҡыуға ылыҡтырыу, уларҙың өҙлөкһөҙ уҡыуҙарын ойоштороу эше хәҙер бик яуаплы, государственный әһәмиәтле һәм кискергеһеҙ бурыс булып тороуын күрһәтә.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әле һаман үҙҙәрендә белеме түбән уҡытыусылар күп була тороп та, бер генә ситтән тороп уҡыусыһы ла булмаған районлар ҙа бар. Мәҫәлән, Зианчура районында бер генә уҡытыусы ла ситтән тороп уҡыуға ылыҡтырылмаған. Ә Бүҙәк районында улар 15, Ҡалтасы районында 7 генә кеше иҫәпләнә. Бындай райондарҙы тағы бик күп күрһәтергә мөмкин. Шундай аяныс хәлгә ҡарамаҫтан, юғарыла әйтелгән райондарҙың мәғариф бүлектәре мөдирҙәре Тучков, Байраков һәм Бочкарев иптәштәр ошо көнгә тиклем уҡытыусыларҙың ситтән тороп уҡыуҙарын ойоштороу сараларын күргәндәре юҡ. Был хәл, күп меңләгән балаларҙың, юғары квалификациялы уҡытыусылар булмау һөҙөмтәһендә, фән нигеҙҙәрен тулы өйрәнә алмауҙары һәм шуға сәбәпле коммунистик тәрбиә эшенең унда юлға һалынмауы был иптәштәрҙә яуаплылыҡ тойғоһо уятмай.

Һан яғынан ситтән тороп уҡыусылары күп булған райондарҙа ла уҡытыусыларҙың белемен күтәреү эше яҡшы ойошторолған тип әйтеп булмай. Сөнки уларҙа ла бик күп уҡытыусылар ҡағыҙҙа ғына ситтән тороп уҡыусы булып иҫәпләнәләр, улар әле булһа уҡырға башламағандар йәки... башлап ташлағандар. Улар йәйге һәм ҡышҡы сессияларға килмәйҙәр, контроль эштәрҙе үтәмәйҙәр, өйҙә үҙ алдарына уҡымайҙар. Үҙенең бөтә уҡытыусылыҡ ғүмерен тип әйтерлек «ситтән тороп уҡыусы» булып үткәреүсе уҡытыусылар ҙа аҙ түгел.

Йәки бына тағы бер фактыны алайыҡ. Ситтән тороп уҡыусыларҙың курстан-курсҡа күсеүен һәм уҡыу йортон тамамлаусылар һанын алып ҡарайыҡ. Бәләбәй педучилищеһында 1946—47 уҡыу йылында йәйге сессияға килгән 265 уҡытыусынан юғары кластарға тик 13 кеше генә. Ишымбай педучилищеһында 80 кешенән бары — 17. Башпединститутта шул уҡ йылда 404-тән 75 кеше генә юғары курстарға күсерелгән. Бөрө уҡытыусылар институтын һуңғы 3 йыл эсендә бары 6 кеше, Өфө уҡытыусылар институтын 1947 йылда 11 кеше тамамланы. Ә бына Бәләбәй педучилищеһе 1947 йылда бер генә кеше лә сығарманы.

Был ни өсөн шулай булды һуң? Айырыуса мөһим был эштең ошондай ғафу ителмәҫлек артта ҡалыуына кем ғәйепле?

Беренсенән, ғәйеп мәктәп мөдирҙәре һәм директорҙарының күбеһенең был эшкә яуапһыҙ ҡараүҙарында. Үҙ коллективендәге түбән белемле уҡытыусыларҙың белемен тулыландырыу тураһында ҡайғыртҡан, был юлда өҙлөкһөҙ эшләгән мәктәп директоры йәки мөдирҙәрҙе беҙҙә бик һирәк осрайҙар әле. Күп директорҙар ситтән тороп уҡыусының үҙ алдына эшләүен, уға бирелгән эштәрҙең нисек үтәлеүен тикшермәйҙәр. Беҙҙә ситтән тороп уҡыусыға ярҙам итеү түгел, хатта экзаменацион сессияларға ла ваҡытында бармаусыларға сара күреү тураһында ла уйламайҙар.

Республикабыҙ мәктәптәрендә белеме тулы булмаған директорҙар һәм мөдирҙәр ҙә бик күп. Бындай тулы әҙерлекһеҙ етәкселәрҙең мәктәптәр ҡотҡарылмаҫаҡ, әлбиттә. Ләкин бөгөн директор булып эшләгән бындай етәкселәр үҙҙәре өлгө булып, үҙ мәктәптәренең бүтән уҡытыусыларын да уҡыуға ылыҡтырырға, уларҙан хөкүмәт ҡарарында күрһәтелгәнсә, белемдәрен тулыландырыуҙы талап итергә тейештәр.

Мәктәп етәкселәренең ситтән тороп уҡыуҙарының ҡәнәғәтләнмәҫлек хәлдә булыуына район мәғариф бүлектәре лә ғәйепле. Сөнки улар мәктәп етәкселәренән был эште ныҡлап талап итмәйҙәр, ситтән тороп уҡыуға бәйләнгән эштәрҙе улар аша үткәрмәйҙәр.

Ситтән тороп уҡыу эшенә яуапһыҙ ҡарау фактылары уҡыу йорттарында ла күп осрай. Институт етәкселәре иптәш Валиев (Өфө), иптәш Гужвенко (Бөрө) экзаменацион сессия йәки уҡыуға ҡабул итеү ваҡыттарында был эш менән ҡыҙыҡһынмайҙар ҙа.

Быйыл ҡабул итеү срогы беренсе июлдә бөтә. Ә пединститутҡа 925 урынына бары 375 кенә ғариза килгән. Бөрө, Стәрлетамаҡ институттарында ла шул уҡ хәл.

Мәғариф Министерствоһы ла ситтән тороп уҡыу эше менән аҙ шөғөлләнә, насар етәкселек итә әле. Министерствоның кадрҙар әҙерләү управлениеһе әлегә тиклем иң мөһим мәсьәләләрҙең береһе булған был эштә үҙенең бурысын юнләп үтәгәне, ысын мәғәнәлә оператив етәкселекте ғәмәлгә ашырғаны юҡ.

Ошо 1948 йылғы ҡабул итеү осоронда һәр районда, һәр мәктәптә белеме етерлек булмаған бөтә уҡытыусылар ҙа ситтән тороп уҡыуға инеп бөтөргә тейештәр. Беҙҙең бөтә көс һәм иғтибар уларҙы регуляр уҡытыу һәм яҡын йылдарҙа тулы белемле итеп сығарыу бурысын үтәүгә бирелһен. Шуға күрә бөтә мәғариф бүлектәре, педагогик уҡыу йорттарының директорҙары, мәктәп етәкселәре тиҙерәк был мәсьәләне хәл итергә, белеме тулы булмаған бөтә уҡытыусыларҙы ла ситтән тороп уҡыуға ылыҡтырыу бурысын үтәргә тейештәр. Ситтән тороп уҡыуҙың мәжбүри икәнлеген белеме етерлек булмаған һәр бер уҡытыусының аңына еткерергә кәрәк. Уҡырға теләмәгән, экзаменацион сессияларға йөрөмәгән уҡытыусыларҙы эштән бушатырға, наҙан, тупаҫ уҡытыусыларҙан мәктәпте ҡотҡарырға кәрәк.

Дөйөм белем һәм политик яҡтан артта ҡалған уҡытыусылар араһында үҙенең педагогик стажы менән маһайып уҡыуҙан баш тартыусылар ҙа осрай. Ундай туңып ҡалған «уҡытыусылар» беҙҙең йәш быуынды фән нигеҙҙәре менән ҡоралландырыу, уны юғары коммунистик аңлы граждандар итеп тәрбиәләү урынына, киләсәктә юғары квалификациялы кадрҙарҙың етештереүенә ҡамасау булып ҡына торалар. Беҙ ундай ярамһыҙ уҡытыусылар ҡулына йәш быуынды тапшыра алмайбыҙ.

Йәйге курстар тураһында бер ике һүҙ әйтергә кәрәк. Ул курстар уҡытыусыларҙың квалификацияларын күтәреү маҡсаты менән үткәрелә. Хөкүмәт тарафынан раҫланған план буйынса бер айлыҡ курстарға V—X класс уҡытыусыларынан 370 кеше Өфөгә саҡырыласаҡ һәм I—IV класс уҡытыусыларынан 1000 кеше бер кисә районда төрлө курстарҙан үткәреләсәк.

Күп кенә райондарҙың мәғариф бүлек мөдирҙәре үткән йыл был курстарға уҡытыусыларҙы бөтөнләй йәки тулыһынса ебәрмәнеләр. Быйыл ундай тәртипһеҙлек аҙ ғынаһына ла ҡабатланмаҫҡа тейеш.

Педагогик уҡыу йорттары экзаменацион сессияға һәм курстарға килгән уҡытыусыларҙы яҡшы, хәстәрле ҡаршы алырға, уларға көнкүреш тормош, уҡыу шарттарын алдан әҙерләп ҡуйырға тейештәр.

Мәктәптең үҙәк фигураһы — уҡытыусы. Шуның өсөн, унда уҡытыу, тәрбиәнең уңышлы барышы нигеҙҙә, уҡытыусының белемен әҙерлегенә, квалификацияһының тулылығына, идея-культура кимәленә ҡайтып ҡала. Бөгөнгә көндә мәктәптәрҙә 13—15 процентҡа тиклем уҡыусыларҙың класта икенсе йылға ҡалыуҙары, бөтәһенән элек уҡытыусының әҙерлеге түбәнлектән, белеме яғынан зәғиф булыуынан килә. Шуға күрә мәғариф бүлектәре партия һәм совет органдарының яҡындан ярҙамы менән тиҙ йылдарҙа уҡытыусыларға тулы белем биреү бурысын хәл итергә тейештәр.

С. Әлибаев,

БАССР Мәғариф министры.

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛЫ— ХАЛҠ ТӨҘӨЛӨШӨ ТРАССАҒА ОЙОШҠАН РӘҮЕШТӘ СЫҒЫРҒА

☆ ☆ ☆

Колхоз председателдәре һөйләй

Башҡортостанда биш йыллыҡтың мөһим төҙөлөштәренән булған Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөү башлана. 10 июнь — төҙөлөшкә массовый эшкә сығыу көнө. Бөтә халҡ ҡатнашлығында башҡарылырға тейеш булған был төҙөлөшкә Маҡар районынан да меңдәрсә колхозсы, йөҙҙәрсә атлы эшсе сығасаҡ.

— Юл төҙөү эшенә сығыуға нисек әҙерләнәһегеҙ?

Беҙҙең сотрудникебеҙ Маҡар районының күп кенә колхоз председателдәренә ошондай һорау менән мөрәжәғәт итте. Улар түбәндәгеләрҙе һөйләнеләр.

Удар бригада

— Беҙҙең колхозсылар, — тине «Шишмә» колхозының председателе иптәш F. Таһиров, — Өфө—Ишембай тимер юлын төҙөүҙә ҡатнашып, үҙҙәренең стахановсы хеҙмәт вкладын индергәйнеләр. Бының дауамы булған Ишембай—Ермолаевка юлын төҙөүҙә лә ҡатнашабыҙ һәм 1.400 кубометр ер эштәре башҡарырға тейешбеҙ.

Ер эштәре башҡарыу еңел түгел. Колхозсылар быны аңлайҙар. Шуның өсөн дә юл төҙөлөшөнә китә торған бригадаға колхоздың иң яҡшы стахановсылары, коммунист һәм комсомолецтәре яҙылдылар. Бригадир итеп колхоздың иң яҡшы стахановсыһы Хажибәк Ишмөхәмәтов билдәләнде. Ә уның ярҙамсыһы коммунист Самат Ҡотдусов, ер эшендә ҡатнашыу менән бергә, бригадала политик-массовый эш алып барасаҡ. Алдынғы кешеләрҙән торған был бригада үҙен удар бригада, тип иғлан итте.

Юл эшенә иң яҡшы ат бүленде. Бригадалағы 15 кешегә етерлек носилка, ағас һәм тимер көрәк, лом, кирка әҙерләнде. Бөтә әҙерлек эштәрен тәьмин итеп, бригада 8 июнда ойошҡан рәүештә төҙөлөш участкаһына сығып китте.

15 кешенән торған бригада һәм бер ат юл төҙөлөшөндә задание тамамланғанға тиклем эшләйәсәк. Ләкин беҙ эште тиҙләтеү өсөн массовый воскресниктар ойошторабыҙ. Быны колхоз ағзалары үҙҙәре теләйҙәр. Сөнки һәр бер колхозсы яңы биш йыллыҡтың мөһим төҙөлөшөнә үҙенең хеҙмәт вкладын индереп ҡалырға теләй.

Егерме көндә

«Сулпан» колхозының председателе иптәш F. Мәҡситдинов беҙгә түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

—Колхозға Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөндә 1320 кубометр ер эштәре башҡарыу заданиеһе бирелде. Райсовет исполкомы был заданиене үтәү өсөн 12 кеше һәм бер ат ебәреүгә тәҡдим итте һәм ер эштәрен 40 көн эсендә тамамлау бурысын ҡуйҙы.

Правление ултырышында мөһим төҙөлөштәге эште тағы ла ҡыҫҡараҡ срокта тамамлау бурысын ҡуйып, 14 кеше һәм ике ат составында бригада төҙөнөк. Бригадаға иң яҡшы стахановсы колхозсыларҙан тора. Ә бригадир итеп Зәйнәғәли Хәсәнов билдәләнде.

Хәсәнов Зәйнәғәли, — ти ул, — үҙенең намыҫлы хеҙмәте, тапшырылған эште үтәүгә колхозсыларҙы ойоштора белеүе менән танылған стахановсы. Тиҙ башҡарылырға тейеш булған мөһим заданиеларҙе үтәү эшен күп ваҡыт беҙ уға тапшырабыҙ.

Бригада члендәре менән үткәрелгән йыйылышта уларҙың һәр береһе көн һайын 5 кубометр, ә тотош бригадаға 70 кубометр ер эштәре башҡарырға йөкләмә алдылар.

— Трассала заданиене 20 көндә тамамларға, был ваҡыт эсендә 1320 урынына 1400 кубометр ер эштәре башҡарырға йөкләмә алам, —тине бригадир иптәш Хәсәнов.

Алдынғылыҡ өсөн

— Беҙҙең колхозсылар, — ти «Петровский» ауыл хужалығы артеленең председателе иптәш П. Морозов, — хөкүмәт заданиеларен үтәүҙә социалистик ярышты ҡулланып эшләйҙәр һәм яҡшы уңыштарға өлгәшәләр. Үткән сезонда улар урманда ағас әҙерләүселәр араһында ярышты башлап ебәреүселәрҙең береһе булдылар һәм задание срогынан ике аҙнаға элек үтәлде.

Күп еңеүҙәрҙе тәьмин итеүҙә һыналған метод булған социалистик ярыш Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә лә хәл иткес роль уйнаясаҡ. Ә бөтә халҡ төҙөлөшөндә — улар төҙөлөштә ярышып эшләмәү мөмкин түгел. Колхозсылар йыйылышта шулай тинеләр һәм трассаға биш кеше урынына ун кеше ебәрергә, заданиене үтәү срогын ике тапҡырға ҡыҫҡартырға йөкләмә алып, Петровск ауыл Советындағы бөтә колхоздарҙы ярышҡа саҡырҙылар.

Юл эшенә колхоздың алдынғы кешеләренән төҙөлгән махсус бригадаға стахановсы Егор Сорокин етәкселек итә. Районда үҙ колхозыбыҙҙың алдынғылығы өсөн, ә трассала эшләүсе районлар араһында Маҡар районының алдынғылығы өсөн ярышабыҙ.

Орлоҡ участкаларына—даими иғтибар

Юғары һәм тотороҡло урожай алыуға йүнәлтелгән саралар комплексында орлоҡсолоҡ айырыуса мөһим урын тота. ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарары нигеҙендә колхоздар 1949 йылдан да һуңламайынса тик районлаштырылған юғары уңышлы сортлы орлоҡ сәсеүгә күсеүҙе тамамларға тейештәр. Орлоҡ участкаларының йыйылда торған урожай колхоздың бөтә сәсеүлектәрен юғары сортлы орлоҡ менән тәьмин итергә тейеш. Тимәк, колхоздар орлоҡ участкаларындағы хәҙерге эштәрҙе һәр йыл элекке йылдың урожайын хәл итәләр. Ағымдағы йылда колхоздарҙың орлоҡсолоҡ хужалыҡтарын ҡыйыу үҫтереү өсөн бөтә шарттар бар. Быйыл ҡупселек колхоздарҙа орлоҡ участкалары сортлы орлоҡ менән сәселде. Был ҡул быйыл орлоҡ участкаларын сортлы орлоҡтар менән тәьмин итеү мөмкинлеге бирә.

Ләкин орлоҡ участкаларынан юғары урожай алыу өсөн был сортлы орлоҡтар сәсеү менән генә эш бөтмәй. Был өсөн орлоҡ участкаларында юғары урожай алыуға булышлыҡ итә торған агротехник саралар комплексын тормошҡа ашырырға кәрәк. Ишмаҡ, Учалы, Бишбүләк, Көйөргәҙе, Благовар райондарының күп колхоздары орлоҡ участкаларына айырым иғтибар итмәйҙәр. Агротехника ҡағиҙәләрен үтәмәү, сәсеүлектәрҙе ҡарамау, урожай йыйыуҙы һуңлатыу һөҙөмтәһендә был райондарҙың колхоздарында орлоҡ участкаларының урожайы түбән булды һәм улар үҙ колхоздарын сортлы орлоҡ менән тәьмин итмәнеләр.

Дәүләкән, Яңауыл, Белокатай, Борай һәм башҡа райондарҙың бик күп колхоздары тотош майҙандарҙа юғары урожай алыу өсөн көрәшеп, орлоҡ участкаларына айырыуса иғтибар итәләр. Был колхоздарҙа даими орлоҡсолоҡ звенолары эшләйҙәр һәм улар беркетелгән участкаларҙы юғары агротехник кимәлдә эшкәртәләр. Бының киреһенә күрһәткән районлар ҙа юҡ түгел. Бәләбәй, Федоровка, Мәләүез, Илеш райондарының күп колхоздарында орлоҡсолоҡ звенолары тик ҡағыҙҙа ғына иҫәпләнәләр. Бәләбәй районының «Верный путь», «Вторая пятилетка» колхоздарында орлоҡ участкаларын сәсеү үткәрелгән кенә булды. Илеш районының Карл Маркс һәм Тельман исемендәге колхоздарында орлоҡ участкаларында ашлыҡ ҡул менән сәселде. Бындай фактылар Йомағужа, Благовар, Кушнаренко райондарында ла бар. Әлбиттә, орлоҡ участкаларына ҡарата бындай ҡараш быйылғы сакта юғары урожай алып булмаясаҡ. Колхоздарҙа орлоҡсолоҡ хужалыҡтары нығытыу мәсьәләһе бөтә ауыл хужалығы работниктарының, бөтә партия һәм совет органдары етәкселегенең иғтибар үҙәгендә торорға тейеш.

Юғары урожай өсөн көрәштә хәҙер иң яуаплы осор. Бөтә игелгән сәсеүлектәрҙе, беренсе нәүбәттә орлоҡ участкаларындағы сәсеүлектәрҙе, тәрбиәләүҙе юғары кимәлдә ойошторорға кәрәк. Хәҙер үк колхоздарҙа орлоҡ участкаларында булеү... ... культуралары ... ашлау ... тикшерергә кәрәк. Орлоҡ участкаларына беркетелгән звенолар... урожай йыйыуға тиклем беркетелергә һәм даими тәрбиәләргә ойошторорға кәрәк. Сәсеүлектәрҙе ылағандарынан таҙартырға, орлоҡ культураларын ваҡытында үтәргә, уңыштарын йыйыуға ...ҙе урожай йыйыу ... тейеш. ... Урожай мастерҙарының бай тәжрибәһе орлоҡ участкаларында ... ҡулланылырға тейеш.

Орлоҡ участкаларында быйыл ... эш үҫемлектәргә һәлмә ... ҡулланылырға тейеш. ... быйыл... тары һәм люцерна сәсеүлектәрен ялан ... уроҡ... орлоҡтарҙы сортлы тиҫтаһына ... сортлыҡ сифаттары ...

Район ауыл хужалығы бүлектәре, агрономдар, колхоз етәкселәре орлоҡ участкаларын тәрбиәләү сараларын үткәреү менән бергә, сәсеүлектәрҙән сорт сифаттары һәм таҙалыҡтары билдәләү өсөн апробация ... тейештәр. Уның өсөн кадрҙар әҙерларга, был саралар үткәрелергә тейешле... ... сортлыҡ ... һәм унда сәселгән орлоҡ материалының сифаты күрһәткән документтарҙы тикшерергә кәрәк. Был сараны үткәреүгә тик орлоҡ участкаларын сортлы ... ҡараштары ...

Н. Руднев,

БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының бөртөклө ... ауыл хужалығы культуралары бүлеге начальнигы.

Сәсеүлектәрҙе утау

Шишмә районы «Түҙәрәк» колхозында сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу ҙур ойошҡанлыҡ менән бара. Бөтәһе 180 гектар майҙанда арыш, 150 гектар майҙанда бойҙай сәсеүлектәре утаулды.

Сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләү өсөн бөтә баҫҡыусылыҡ бригадалары һәм звенолар социалистик ярышҡа сыҡтылар. Утауҙа беренсе һәм өсөнсө бригдалар алда . баралар. Көндәлек эш нормалары икеләтә арттырылып үтәлә.

В. Хәликов.

Мал үрсетеү буйынса социалистик ярышта еңеүсе «Безбожник» ауыл хужалығы артеле Ҡандра район Советы исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды. Колхозда йылҡы ҡараусы иптәш Мирошина үҙенә беркетелгән 12 баш бейәнән быйыл 10 ҡолон алды.

Һүрәттә: Иптәш Е. А. Мирошина үҙе тәрбиәләгән йылҡылар янында. **Е. Пряжевский фотоһы.**

Специалист кәңәштәре

Мал үрсетеүҙә зооветеринарияның яңы саралары

Малсылыҡ работниктәре зооветеринарияның бөтә яңылыҡтары менән таныш булырға һәм уларҙы киң рәүештә ҡулланырға тейештәр. Шулай булғанда ғына общественный малсылыҡты уңышлы алға ебәрергә мөмкин.

Был мәҡәләбеҙҙә беҙ йәш малдарҙағы ауырыуҙарға һәм малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуҙарына ҡаршы көрәш сараларының яңылыҡтары менән таныштырырға теләйбеҙ. Ошо маҡсат менән Башҡортостан ғилми-тикшеренеү ветеринария тәжрибә станцияһында академик М. П. Пушнов методынса әҙерләнгән ике дарыу ҙур әһәмиәткә эйә. Был дарыуҙар станцияның ғилми сотрудниктәре Н. Н. Фосс һәм Х. С. Юлдыбаев иптәштәрҙең тәжрибәләре буйынса, башҡа дарыуҙарға ҡарағанда иң яҡшылары итеп табылдылар.

Яңы дарыуҙарҙың береһе йәш малдарҙағы ауырыуҙарға ҡаршы көрәш һәм икенсеһе малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуҙарына ҡаршы көрәш маҡсаттарында ҡулланыла.

Малдарҙы, бигерәк тә йәш малдарҙы, тәрбиәләүҙә зоогигиена-санитария ҡағиҙәләрен дөрөҫ ҡулланыуҙың кәрәклеге һәр кемгә билдәле. Йәш малдар күберәк ваҡыттарҙа энзоотик-бронхопневмония, тип аталған йоғошло үпкә ауырыуы менән ауырыйҙар, һәләк булалар.

Энзоотик-бронхопневмония тип аталған йоғошло үпкә ауырыуын булдырмау һәм уның менән ауырыусы йәш малдарҙы дауалау өсөн лиенолизат тип аталған дарыуҙы ҡулланырға тәҡдим ителә.

Лиенолизат — ауырыу малдарҙы һауыҡтыра һәм малдарҙың органдарын ауырыуҙарҙан һаҡланыу ҡеүәтен көсәйтә торған дарыу ул. Был дарыуҙы ҡулланыу юлы бик ябай. Ул шприц менән укол рәүешендә ҡулланыла. Ул сусҡа балаһының бот, ә быҙауҙың муйын тиреләре аҫтына ебәрелә. Укол өсөн дарыу дозаһы: малдың һәр бер 10 килограмм ауырлығына беренсе тапҡыр — 0,5, өс көндән һуң икенсе тапҡыр — 0, 75 һәм биш көндән һуң өсөнсө тапҡыр — 1,0 кубик сантиметр миҡдарында ҡулланыла. Был дарыу шулай уҡ ҡолондарҙағы һаҡау һәм тояҡ тимерәүе (мокрец) ауырыуҙарына ҡаршы көрәш өсөн дә файҙаланыла. Дарыулау эффектле булһын өсөн, малды яҡшы тәрбиәләү кәрәклеген дә оноторға ярамай.

Лиенолизат профилактик маҡсаттар өсөн дә ҡулланыла. Йоғошло ауырыуҙың таралыу ҡурҡынысы аҫтында ҡалған йәш малдарға был дарыу менән укол яһау уларҙы ауырыуҙан һаҡлап алып ҡала.

Малдарҙың ҡыҫыр ҡалыуҙарына ҡаршы көрәш өсөн дә махсус дарыу ҡулланырға мөмкин. Был маҡсат өсөн әҙерләнгән оварнолизат һәм тестолизат тип аталған дарыуҙар бар. Оварнолизат бейә, һыйыр, һарыҡ һәм кәзәләр өсөн, ә тестолизат—айғыр, үгеҙ һәм тәкәләр өсөн ҡулланыла.

Дарыуҙар шулай уҡ укол һалыу юлы менән файҙаланыла. Айғыр, үгеҙ һәм тәкәләр өсөн дә, шулай уҡ бейә, һыйыр һәм һарыҡ-кәзәләр өсөн дә дарыуҙар 1—2 тапҡыр 10—15 кубик сантиметр миҡдарында муйын тиреһе аҫтына ебәреләләр.

Был саралар малсылыҡты үрсетеүҙә фән һәм практика яңылыҡтары булып торалар. Зооветеринария специалистәре һәм бөтә малсылыҡ работниктәре уларҙы ҡыйыу рәүештә файҙаланырға тейештәр.

Х. Әюпов,

Башҡортостан ғилми-тикшеренеү ветеринария тәжрибә станцияһының ғилми сотрудниге.

Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре

Башҡорт әҙәби теленең формалашыуының беренсе йылдарында әҙәби телдең лексик нормаһы, терминология мәсьәләләрендә ғәрәп, фарсы һүҙҙәренә, башҡорт теле архаизмдарына ориентация йоғонһоло көслө булды. Буржуаз милләтселәр башҡорт әҙәби теленә дөйөм ҡабул ителгән интернациональ терминдәр, рус әҙәби теле аша инеп, үҙләшеп барған рус һүҙҙәре урынына халҡҡа һис аңлашылмаған ғәрәп, фарсы һүҙҙәрен, башҡорт теле архаизмдарын индереп ебәрергә тырыштылар. Ғилми үҙәк янындағы терминология комиссияһы тарафынан 1928 йыл төҙөлгән физика, биология, әсә теле терминдәре һүҙлектәре, башҡорт телен тормошҡа ашырыу үҙәк Комиссияһы ҡарамағында төҙөлөп, 1928 йылда баҫылып сыҡҡан «Эш атамалары» һүҙлеге, марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәрен тәржемә итеү комиссияһы тарафынан төҙөлөп, 1931 йылда баҫып сығарылған политик-экономик терминдәр һүҙлеге быны асыҡ күрһәтәләр.

Башҡорт әҙәби телен ғәрәп теле йоғонтоһонан, архаизмдарҙан таҙартыу мәсьәләһендә 1937 йылдан һуң, бигерәк тә рус графикаһы нигеҙендә төҙөлгән алфавитҡа күсҡәс, ҡырҡа боролош яһалды. Ғәрәп, фарсы һүҙҙәренән беҙҙең телдә бик ныҡ үҙләшеп киткәндәре генә ҡалдырылдылар. (Исем, ваҡыт, заман, тәьмин һ. б). Шуның менән бергә, башҡорт хеҙмәтсәндәренең һөйләү теленең һүҙ байлыҡтарын әҙәби телдең лексик составына индереп ебәреүҙә лә күп кенә уңыштар күрәбеҙ.

Ләкин шуға ҡарамаҫтан, беҙҙә әҙәби телдең лексик нормаһы, терминология мәсьәләләре өлкәһендә серьез етешһеҙлектәр бар. Улар, нигеҙҙә, түбәндәгеләргә ҡайтып ҡалалар:

а) Бер үк терминде төрлө урында төрлөсә ҡулланыу.

б) Әҙәби телде билдәле бер һүҙ запастары менән сикләү.

Башҡорт хеҙмәтсәндәренең һөйләү теленең лексик байлығын етерлек дәрәжәлә файҙаланмау. Шуның арҡаһында яһалма һүҙҙәр уйлап сығарыу һәм ябай ғына һүҙҙәрҙе лә тәржемә итмәй алыу факттары.

в) Айырым ваҡиғаларҙа, рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙе тулыһынса файҙаланмау.

г) Әҙәби телгә һөйләү теленән һүҙҙәр алғанда, диалектизмға, архаизмға бирелеү факттары.

Тел, әҙәбиәт институты тарафынан эшләнеп, 1940 йыл декабрҙә үткәрелгән ғилми тел конференцияһы ҡабул иткән терминология принциптәре бар. Тел конференцияһы тарафынан ҡабул ителгән был принциптәр хәҙерге көндә лә ҡулланма хеҙмәтен үтәйҙәр. Шул принциптәр нигеҙендә төҙөлөп, 1941—42 йылдарҙа бер нисә фәндән терминология һүҙлектәре баҫтырып сығарылды. 1942 йылда орфография һүҙлеге баҫылып сыҡты. Орфография һүҙлегенең төп маҡсаты, әлбиттә, һүҙҙәрҙең яҙылышында берлек индереүҙән тора. Ләкин шуның менән бергә, был һүҙлеккә ингән һүҙҙәр әҙәби телдең лексик составын ташкил итәләр.

Бөтә бәлә шунда, беҙ әҙәби телдең лексик нормаһын билдәләүсе принциптәрҙе тулыһы менән тормошҡа ашырмайбыҙ, был принциптәр менән күп ваҡытта иҫәпләшмәйбеҙ. Шул арҡала, әҙәби телгә яңы инә барған һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙа ғына түгел, әҙәби телгә инеп, әҙәби телдең лексика байлығы булып киткән һүҙҙәрҙе, терминдәрҙе ҡулланыуҙа ла төрлөлөк хөкөм һөрә. Бер үк һүҙҙе Башгосиздатта бер төрлө, газета, журнал редакцияларында, радиокомитетта икенсе төрлө ҡулланыуҙы әйтеп тораһы ла юҡ, хатта бер үк урында бер һүҙҙе ике-өс төрлө ҡулланыу факттарын йыш ҡына осратырға тура килә. Мәҫәлән, Башгосиздат һәм «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһы государство тип, ә «Октябрь» журналы дәүләт тип тә, государство тип тә йөрөтә. Радиокомитет бер урында участка, вкусовой промышленность тип, ә шул уҡ һүҙҙәрҙе икенсе урында участок, тәмтом промышленносе тип йөрөтә. Әҙәби телдә индивидуаль йөкләмә тип алынған һүҙҙе радиокомитет шәхси йөкләмә тип йөрөтә. «1946—1947 уҡыу йылында урта мәктәп курсы күләмендә өлгөргәнлек аттестаты экзамендәре үткәреү өсөн билеттар» тигән китапта «зрелость» һүҙе бер ерҙә өлгөргәнлек тип, икенсе урында өлгәшкәнлек тип тәржемә ителгән. Әҙәби телдә «өн», «һөйләм» формаһында ҡабул ителгән һүҙҙәр был китапта «ауаҙ», «йөмлә» тип алынғандар, шул уҡ ваҡытта бер нисә урында «һөйләм» тип тә йөрөтөлә.

Грамматика дәреслегендә (Ә. Мансуров, 1948, I к.) терминология һүҙлегендә ирекләшкән өндәр, эйәлек килеш... тип алынған һүҙҙәр ирен өнө, эйәлек килеше тип йөрөтөләләр. Иптәш Ждановтың «Халҡ-ара хәл» тураһында тигән докладындағы «самоопределение» һүҙен «Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы бер урында «үҙ яҙмышын үҙе хәл итеү» ... тип, ә икенсе урында «үҙ үҙҙәрен билдәләү» тип тәржемә итә.

Һүҙҙәрҙе, терминдәрҙе ҡулланыуҙа берлек юҡлыҡҡа бик күп миҫалдар килтерергә мөмкин, ләкин үрҙә килтерелгән факттар ҙа беҙҙең был фекерҙе дөрөҫләү өсөн етер тип, уйлайбыҙ.

Урынһыҙ рәүештә һүҙҙәрҙе мәғәнәгә-мәғәнә, хәрефкә-хәреф тәржемә итеп алыуҙар осрай. Был принципте бер ҙә ҡулланырға кәрәкмәй, тигән һүҙ түгел. Бик күп һүҙҙәр, беҙҙә шулай тәржемә итеп яһап алынып, әҙәби телдең лексикаһына инеп киттеләр. Мәҫәлән: тәүтормош (первобытный), эҙмә-эҙ (последовательно), халҡ-ара (международный), башлыса (главным образом), үҙенсәлек (особенность) һ. б. Бында һүҙ урынһыҙ алынған калькалар тураһында бара.

Рус әҙәби теле аша ингән сифаттарҙы, рәүештәрҙе ҡулланыуҙа беҙҙә бер төрлөлөк юҡ. Мәҫәлән, редакция, радиокомитет, Башгосиздат бер урында сифаттарҙы исем формаһында (район кәңәшмәһе, информация бюроһы һ. б.), ә икенсе урында килеп, «и», «он» ялғауын ҡушып (информацион бюро, республикан кәңәшмә һ. б.) алалар.

Һуңғы ваҡытта урынһыҙға рус телендәге ҡылымдарға башҡорт телендәге ярҙамсы ҡылым «итеү» ҡушып ҡулланыу йыш ҡына осрай. Мәҫәлән, отмирать итеү, разрушать итеү һ. б.

Телдәге синонимдар әҙәби телдә ҡулланылмай. Мәҫәлән, бөтә урында «тураһында», «тиклем» һүҙҙәре ҡулланылып, ә уларҙың синонимдәре булған «хаҡында, хәтлем, хәтле, ҡәҙәрле» һүҙҙәре ҡулланылмай. Шуның арҡаһында һөйләмдәр төҙөлөшөндә ҡытыршылыҡтар килеп сыға.

Әҙәби телдә терминдәрҙе, айырым һүҙҙәрҙе ҡулланыуҙағы төрлөлөктә бөтөреү өсөн, түбәндәгеләр талап ителә:

Әҙәби телдең лексик нормаһын билдәләүсе принциптәрҙе һәм ул принциптәр нигеҙендә төҙөлөп, баҫтырылған һүҙлектәрҙе ҡулланыу бөтә кеше өсөн мәжбүри булырға тейеш. Мәҫәлән, математиканан төҙөлгән һүҙлектә числитель, знаменатель тип алынған икән, дәреслек төҙөүселәр ҙә, редакция работниктәре лә, һ. б. уларға оҡшаймы, оҡшамаймы, шул терминдәрҙе ҡулланырға тейештәр. Улай булмағанда, һүҙҙәр, терминдәр ҡулланылышында берлек булырға мөмкин түгел.

Терминдәрҙе эшләү, теге йәки был терминде, һүҙҙе ҡабул итеүҙе хәл итеү мәсьәләһе бер ергә тупланған булырға тейеш. Айырым фәндәр буйынса терминология һүҙлектәре төҙәп сығарыу эше быға тиклем М. Ғафури исемендәге Тел әҙәбиәт институты тарафынан башҡарылып килде. Ләкин әҙәби телгә яңы ингән һәм инә барған терминдәрҙе нисек ҡабул итеү мәсьәләһен хәл итеү, бер ергә тупланмаған. Һәр бер ойошма (Башгосиздат, газета, журнал редакциялары, радиокомитет һ. б.) һәм унда эшләүсе һәр бер работник, дөйөм принциптәр менән иҫәпләшмәйенсә, теге йәки был терминде, һүҙҙе әҙәби телгә индерә лә ебәрә. Шуның арҡаһында әҙәби телгә дөрөҫ булмаған терминдәр, һүҙҙәр инеп киталәр, уларҙың ҡулланылыуында төрлөлөк килеп тыуа. Беҙҙең Тел, әҙәбиәт институты был мәсьәләлә үҙәк урында торорға тейеш ине, ләкин быға тиклем улай булманы. Киләсәктә, әҙәби телгә индерелә торған терминдәрҙе ҡабул итеүҙе хәл итеү эше институт тарафынан ойошторолорға тейеш. Институтта фәҡәт термин буйынса ғына эшләүсе сотрудниктар булдырылып, терминдәрҙе ҡабул итеүҙе законлаштырыу эше институт советына йөкмәтелергә йәки быны өсөн айырым комиссия төҙөлергә тейеш.

Айырым фәндәрҙең терминология һүҙлектәре төҙөлергә тейеш. Был эш, рус графикаһы нигеҙендәге алфавитҡа күскәс, 1941 йылдан киң генә йәйелдереп ебәрелгәйне. 1941 йылда Тел, әҙәбиәт институтының планы буйынса математиканан, химиянан, физиканан һүҙлектәр төҙөлөп, 1942 йылда баҫылып сыҡтылар. Һуғыш башланыу менән, был эш туҡталып ҡалды. Һуғыш бөткәс, һуңғы ике йылда терминология буйынса бер ни тиклем эш эшләнде һәм эшләнә. Мәҫәлән, 1947 йылда айырым фәндәрҙән, урта мәктәптәр өсөн төҙөлгән дәреслектәр, атап әйткәндә, математика, ботаника, тел дәреслектәре терминология яғынан тикшереп сығылдылар. Географиянан, ботаниканан терминология һүҙлектәре төҙөлдө, хәҙерге көндә баҫырға биреү өсөн әҙерләнеп яталар. Институттың 1948 йылғы планына общественный-политик, зоология, урман хужалығы терминдәре һүҙлектәре төҙөү индерелгән. Ләкин дөйөм алғанда Институттың терминология буйынса эше ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһын билдәләгәндә, төп ниндәй принциптәрҙән сығып эш итергә тейешбеҙ, хәҙер шуға күсәбеҙ.

Хеҙмәтсән башҡорт халҡының һөйләү теленең лексика байлығы һәм рус теле аша ингән терминдәр, һүҙҙәр башҡорт әҙәби теле лексикаһының, башҡорт терминологияһының төп сығанаҡтары булырға тейештәр.

Башҡорт хеҙмәтсәндәренең һөйләү теленең лексика байлығы әҙәби телгә тулыһы менән файҙала...

(Аҙағы 4-се биттә).

Берлин коменданттары урынбаҫарҙарының ултырышында

БЕРЛИН, 6 июнь. (ТАСС). 4 июндә Берлин ҡалаһы коменданттары урынбаҫарҙарының нәүбәттәге ултырышы булды. Ултырышта Совет коменданты урынбаҫары полковник Елизаров, Франция коменданты урынбаҫары полковник Ле Бидо, Британия коменданты урынбаҫары бригадир Бенсон һәм Америка коменданты урынбаҫары полковник Бабкок ҡатнаштылар.

Ултырышта дүрт ил вәкилдәренән төҙөлгән комиссияның отчеты тикшерелде. Был комиссия союзный комендатураның тапшырыуы буйынса Берлиндең Америка секторындағы «ҡара гвардияның» эшен тикшерҙе. Американың комиссиялағы вәкиле объектив рәүештә тикшереүгә төрлөсә ҡаршылыҡ күрһәтте һәм, хатта «ҡара гвардиясыларҙы» дүрт ил комиссияһы члендәренең һорауҙарына яуап биреүҙән тыйҙы. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, тикшереү «ҡара гвардияның» хәрби характерҙағы формирование булып торғанлығын һәм отделениеларҙе, взводтары, роталары, батальондары булғанлығын күрһәтте. Шуның менән бергә, батальондар менән Америка офицерҙәре командовать итәләр. Батальондар Америка зонаһында булған айырыуса ҙур гәскәри соединениеларға инәләр.

Советтәр Союзы вәкиле полковник Елизаров үҙенең сығышында түбәндәгеләрҙе әйтте: «булған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, «ҡара гвардия» штабының баш начальнигенә посыка Америка комакдованиеһе тарафынан атаҡлы хәрби енәйәтсе, Гитлер генеральный штабының элекке начальнигы генерал Гальдер билдәләнгән. Был хәрби енәйәтсе «ҡара гвардиестарҙы» инспектировать итеү өсөн күптән түгел Берлинга килгән. Ләкин Американың дүрт ил вәкилдәре комиссияһындағы вәкиле был фактыны комиссияның башҡа члендәренән йәшерҙе.

«Ҡара гвардияның» бөтә частәрендә һәм подразделениеларендә хәрби өйрәтеү эше үткәрергә тәкдим ителгән. Америка командованиеһе бөтә частәргә һәм подразделениеларға Америка армияһы уставы һәм Америка властәренең махсус инструкциялары менән эш итергә ҡушҡан.

«Ҡара гвардия» реакционерҙәрҙән һәм милитаристәрҙән комплектовать ителә. Совет вәкиле тарафынан тикшерелгән 60 анкета 45 «ҡара гвардиестен» элекке офицерҙәр һәм унтер офицерҙәр булғанлығын, 14-сенең Гитлер армияһының элекке һалдаттары булғанлығын һәм бер генә анкетаның армияла хеҙмәт итмәгән кешенеке булғанлығын күрһәтте».

Комиссияның тикшереүе, — тине Советтәр Союзы вәкиле, — «ҡара гвардияның» башлыса демократик партияларҙы һәм профсоюздарҙы баҫылдырыу өсөн һәм демократтарға, Германияның берҙәмлеге яҡлыларға ҡоралы һөжүмдәр яһау өсөн ойошторолғанлығын күрһәтте. Был турала, айырым алғанда, түбәндәге фактылар һөйләйҙәр:

«Ҡара гвардияның» ҡоралы отряде 26 апрелдә иркле немец йәштәре союзының бер төркөм членларенә һөжүм яһаған. Уларҙың дүртеһе нык яраланған. «Ҡара гвардияның» икенсе бер отряде 27 апрелдә иркле немец йәштәре союзының активисе Эрвин Хюбнергә һөжүм иткән. Фельзендамм урамындағы немец йәштәре йортона йөрөүсе йәштәр ҙә «ҡара гвардиясыларҙың» һөжүмдәренә систематик рәүештә осрайҙар. Билдәле, Берлиндең Америка секторында СЕПГ бинаһына һөжүмдәр шулай уҡ «ҡара гвардия подразделениеларенең ҡатнашлығында үткәреләләр. Берлин хеҙмәтсәндәренең Беренсе май демонстрацияһы ваҡытында «ҡара гвардияның» бөтә подразделениеләре казарма положениеһендә булдылар һәм демонстранттарға ҡаршы сығыу өсөн боевой әҙерлек хәленә килтерелделәр. «Ҡара гвардиясылар» Америка властәре тарафынан 22 майҙан башлап Германияның берҙәмлеге һәм тәҙел тыныслыҡ өсөн халҡтан һорау алыуға ҡатнашыусыларҙы язалау өсөн файҙаланылалар. Халҡтан һорау алыуға ҡатнашыусыларҙы Буков-Ост ҡалаһы янында эттәр ярҙамында тотоу Америка хәрби полицияһы тарафынан «ҡара гвардия» отрядтәре менән берлектә үткәрелгән».

Советтәр Союзы вәкиле «ҡара гвардияның» эшен һис кисекмәҫтән туктатыуҙы һәм уның частәрен, подразделениеләрен таратыуҙы ҡырҡа рәүештә талап итте. Икенсе яҡтан, Совет вәкиле немец полицияһын ныҡытыу кәрәклеге тураһындағы, уны бөтә саралар менән демократиялаштырыу һәм халҡ массаларына яҡынлаштырыу тураһындағы тәҡдимде яҡланы.

Америка вәкиле полковник Бабкок, «ҡара гвардияның» хәрби һәм реакцион характерҙа булыуын йәшерергә тырышып һәм был мәсьәләнең асылы буйынса һорауға яуап биреүҙән тайшанып, был пунктты тикшереүҙе көн тәртибенән алып ташларға тәҡдим итте. Бабкокты Англия һәм Франция вәкилдәре яҡланылар.

Советтәр Союзы вәкиле Бабкоктан: «ҡара гвардияга» Америка армияһының хәрби уставын индереү һәм фетнә була ҡалһа айырым күрһәтмәләр йәки демонстрациялар ваҡытында кисек хәрәкәт итеү тураһында инструкциялар сығарыу ни өсөн кәрәк булды? Складтарҙы ҡарауыллаусылар өсөн ундай инструкцияның һәм күрһәтмәләрҙең кәрәге юҡ та баһа», — тип һорағас, Бабкок бөтөнләй аптырап ҡалды һәм һис бер төрлө яуап бирә алманы.

Советтәр Союзы вәкиленең талап итеүе буйынса, «ҡара гвардия» тураһындағы мәсьәлә коменданттар ҡарамағына тапшырылды.

Советтәр Союзы вәкиле Берлиндең Америка һәм Франция секторҙарында Германияның берҙәмлеге яҡлы кешеләрҙе арескә алыуҙарға һәм туҡмауҙарға ҡаршы ҡырҡа протест менән сығыш яһаны. Тулы булмаған мәғлүмәттәр буйынса, тик Америка секторында ғына 24 майҙан алып 1 июнгә тиклем меңдән артыҡ кеше арескә алынған һәм тотолған. Уларҙың күпселеге — күренекле демократтар, фашизм ҡорбандары. Арескә алыныусылар араһында күп кенә ҡатын-ҡыҙҙар һәм йәш үсмерҙәр бар. Мәҫәлән, былар араһында Гитлер режимена ҡаршы көрәшкән өсөн фашистәр тарафынан атаһы 1943 йыл аҫып үлтерелгән 16 йәшлек Вольфганг Шумахер бар.

Бөтә халҡтан һорау алыу менән шөғөлләнеүсе антифашистәрҙе эҙәрләү өсөн Америка хәрби властәре махсус шпиондар йыялар. Нейкельн районында Германияның социалистик берҙәм партияһының члене, фашизм режиме ҡорбаны булған Карл Винде арескә алыналар. Карл Вин СДПГ (Германияның социал-демократик партияһы) члене — полицейский Альфред Хайзиг тарафынан бик ҡаты туҡмалған, 25 майға ҡаршы төндә СДПГ члене — Нейкельндәге полицейский Шульцтең ошаҡлауы буйынса, артистка Дорис Сковнская арескә алынған һәм Америка хәрби төрмәһенә ебәрелгән.

«Беҙ, — тине Совет вәкиле, — Тюрингиянан, Мекленбургтаң һәм Бранденбургтан Берлиндең Америка секторында йәштәрҙе арескә алыуҙарға ҡаршы протест белдергән телеграммалар алдыҡ. Был йәштәр ошо ерҙәрҙең йәштәр ойошмалары тарафынан Берлиндәге йәштәр мәктәптәренә уҡырға ебәрелгән булғандар. Америка һәм Франция секторҙарында үткәрелгән арестәр киң демократик общественносте ныҡлы асыу тыуҙыра».

Һүҙенең аҙағында Совет вәкиле Америка һәм Франция хәрби полицияларының әшәкелегенә ҡаршы ҡырҡа протест белдерҙе. Һәм Берлиндең Америка, Франция секторҙарында полиция терроры ҡорбандарын ҡотҡарыу тураһында саралар күреүҙе, Германияның берҙәмлеге, гәҙел тыныслыҡ өсөн сығыш яһаусы халҡты тукталыу өсөн [illegible] талап итте.

Франция комендантының урынбаҫары полковник Ле Бидо Германияның берҙәмлеге [illegible] Франция секторында [illegible] Веддинг һәм Гезундбруннен вокзалдарында халҡтан һорау алыу ҡағыҙҙарын конфискациялау. Германияның берҙәмлегенә саҡырыусы плакаттарҙы юҡ итеүҙәрҙең булғанлығын танырға мәжбүр булды. Ле Бидо шулай уҡ 3 июндә союзный комендатураға халҡтан һорау алыу яҡлы кешеләрҙе эҙәрләүҙәргә ҡаршы протест белдергән 42 телеграмма алынғанлығын таныны. Телеграммалар һәм хаттарҙың килеүҙә дауам иткәнлеген әйтте. Ләкин Ле Бидо уларҙы «иғтибарға лайыҡһыҙ» тип иҫәпләй, ә былдай протест телеграммаларын ебәреүсе бөтә ойошмаларҙы һәм кешеләрҙе Франция коменданты вәкиле «фанатиктәр» тип атаны.

Британия коменданты урынбаҫары бригадир Бенсон Германияның берҙәмлеге өсөн булған хәрәкәтте маҡсатһыҙ көрәш тип атауға, ә берҙәмлек тураһында халҡ референдумы талап итеүгә подпискалар йыйыуҙы — енәйәт тип атауға тиклем барып етте.

Совет вәкиле демократик элементтәрҙе, Германияның берҙәмлеге яҡлы кешеләрҙе эҙәрләүҙәргә киҫкен рәүештә ҡаршылыҡ белдерҙе. «Немец халҡының Германияның берҙәмлеге өсөн тырышыуын нисек енәйәт тип атарға мөмкин? тип һораны ул. Совет вәкилдәре һәр ваҡыт берҙәм демократик Германия яҡлы булдылар».

Ултырыш аҙағында Британия комендантының урынбаҫары Бенсон Берлиндә күптән түгел профсоюздарға булып үткән һайлауҙар хаҡында белдереү яһаны. Ул, Британия комендатураһы был һайлауҙарҙы дөрөҫ үткәрелгән һайлауҙар тип танымай тине.

Совет вәкиле Бенсон белдереүе үҙҙәренең һайлауҙарын союзный комендатура тарафынан раҫланған процедураны тулыһынса һаҡлап үткәргән иркле немец профсоюздарының эске эштәренә янынан тупаҫ рәүештә тығылыу булып тора, тип күрһәтте. Был тығылыу Берлиндә профсоюз һайлауҙарының һөҙөмтәһендә Германияны бүлгеләү яҡлыларҙың түгел, ә немец эшселәр синыфының берҙәмлеге яҡлыларының еңеүе арҡаһында килеп сыҡҡанлығы асыҡ күренеп тора, тине полковник Елизаров. Британия комендатураһының белдереүен Берлиндәге иркле немец профсоюздарына [illegible].

[illegible] коменданттары урынбаҫарҙарының [illegible] ултырышына [illegible].

Алтынсы июндә Якутов исемендәге баҡсала 2000 метр дистанцияға комсомол-профсоюз кроссы булды.
Һүрәттә: Старттан бер күренеш.

В. Жданов фотоһы.

Динамосыларҙың еңеүе

Үҙгән ял көндө башҡалала «Динамо» стадионында футбол буйынса РСФСР беренселеге өсөн Өфө спорт обществоһы — «Динамо» һәм Ульяновск ҡалаһының «Спартак» араһында футбольный матч булып үтте.

Матч 3 : 1 иҫәбендә динамосыларҙың еңеүе менән тамамланды.

6 июндә Черниковск ҡалаһының машиналар төҙөү заводы стадионында футбол буйынса РСФСР [illegible] Черниковск ҡалаһының [illegible] командаһы Куйбышевтың «Трудовые резервы» командаһы менән осрашты. Матч 2 : 0 иҫәбе менән [illegible] файҙаһына тамамланды.

Дәүләкән емеш-еләк питомнигендә

Дәүләкәндәге йәшелләндереү һәм емеш-еләк питомнигы киңәйтелә. Бында ағымдағы йылда 8,25 гектар майҙанға алма, сейә, ҡурай еләге, крыжовник ҡыуаҡтары һәм тиҫтәләгән сортта башҡа ағастар ултыртылды. Питомниктеқ [illegible] ағастары, көҙ көнә ултыр[тыу] өсөн, Дәүләкән, Шишмә, М[…] Бөҙәяҙ районДарындағы колх[оз]дарға ебәреләсәк.

Фельетон урынына

Утһыҙ төтөн сыҡмай...

Шишмә районында Сафар ауылы бар. Ҙур ауыл. Бында дүрт йөҙгә яҡын өй, урта мәктәп, бик күп колхоз ҡаралтылары бар. Быны, бәлки, күптәр үҙҙәре лә беләләрҙер. Эш унда түгел. Сафар ауылында янғын һүндереү командаһы ла бар. Ҙур команда. Уның начальнигы Биктимеров Рәхмүш. Беләһегеҙ килһә, был командаға бөтә халҡ күҙ тераған: янғын ҡурҡынысынан һаҡлай ул... Ут — уйынсыҡ түгел, быны Биктимеров үҙе лә яҡшы белә. Белмәһә, уға ундай яуаплы эштәр ҙә тапшырмаҫтар ине...

Бына шул ауылда быйыл, әйткән кеше ышанмаҫ хәл булды: көпә-көндөҙ пожар командаһының өйө янып китте!

Колхозсылар һәнәк, балта, күнәктәр тотоп ут һүндереүгә ташландылар. Ләкин һун ине инде: ун бер мең һумлыҡ йорттан тик көл генә ятып ҡалды. Нишләйһең бит, колхозсылар өлгөрә алманылар. Пожар командаһы [...] яҡып китә күрмәһен, тип т[...] тороп ҡына булмай бит. Кара[һа]ң, Биктимеров командаһы [...] тотош тира-яҡты күҙәтергә [...] йылған.

Быңын өсөн, бәлки, Биктим[еров] Рәхмүшкә бик ҡаты «шелтә» [...] тип уйларҙар. Юҡ, бер нә[мә лә] булманы.

Нишләп булһын? Пожар ко[ман]даһының мискаләре ярыҡ, [...] эсәктәре тишек булһа ла, Рәхм[үш ...] тен — баш йоморо: колхоз пр[ед]седателе Әсәдуллин Нуриславов [...] башҡаларҙың асыу яҡкын[...] ул әсе һыу менән һүндергә[н] ҡуйған, тиҙәр... Был, бәлки, [...] дыр ҙа. Утһыҙ төтөн сыҡмай [...]

Шишмә район прокуроры, [...] хәлдә, Сафар пожар команда[һы ...] кеүек булмаҫ, уяуҙыр, тип ышан[...] быҙ һәм ул, төтөн сыҡҡан [...] урынға барып, ашығыс сара кү[рер].

Б. Аҡ[...]

МУНДТЫҢ АНТИКОММУНИСТИК ЗАКОН ПРОЕКТЫНА ҠАРШЫ ВАШИНГТОНДА ПРОТЕСТ ДЕМОНСТРАЦИЯҺЫ

ВАШИНГТОН, 3 июнь. (ТАСС). Вашингтон паркында массовый демонстрация булды. Был демонстрация һуңғы йылдарҙа Американың баш ҡалаһында булған массовый демонстрацияларҙың иң ҙурыһы иҫәпләнә. Был демонстрацияла һәм унан һуң үткәрелгән митингыла 6 мең кеше ҡатнашты. Митингыла негрҙарҙың күренекле деятеле Поль Робсон, вәкилдәр палатаһы членДәре Маркантонио, Изаксон һәм башҡа күп кенә кешеләр ҡатнаштылар. Сығыштарҙың бөтәһе лә Мундтың антикоммунистик закон проектына ҡаршы йүнәлтелде һәм митингыла ҡатнашыусылар уларҙың сығыштарын көслө алҡыштар менән ҡаршыланылар.

Башҡорт әҙәби теленең лексик нормаһы һәм терминология мәсьәләләре

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

пыларға тейеш. Һөйләү теленең лексика байлығы әҙәби тел тарафынан тулыһынса файҙаланыла, тип әйтә алмайбыҙ әле. Сөнки һөйләү теленең лексика байлығы бик аҙ өйрәнелгән. Беҙҙең тел әҙәбиәт институты был өлкәлә ҡәнәғәтләнерлек эшләмәй. Башҡорт хеҙмәтсәндәренең һөйләү теленең лексика байлығын өйрәнеү эшен киләсәктә нык йәйелдерергә кәрәк. Ләкин бында ике моментте иҫтән сығарырға ярамай. Беренсенән, һөйләү теленең лексика байлығын өйрәнгәндә, төп иғтибарҙы телдең үткәненә йүнәлдермәйенсә, башҡорт хеҙмәтсәндәренең хәҙерге һөйләү теленең лексика составын, уның социаль-политик яңы терминдәр иҫәбенә нисек байыу юлдарын, формаларын өйрәнеүгә йүнәлдерергә кәрәк. Икенсенән, һөйләү теленең лексика байлығын әҙәби телгә алғанда, диалектизмгә, архаизмгә урын булырға тейеш түгел. Беҙҙә, ғәҙәттә, ҡайһы бер иптәштәр теге йәки был һүҙҙең әҙәби телгә алыныу хоҡуҡын үҙенең районында йәки тыуған ауылында ул һүҙҙең ҡулланыу-ҡулланмауы менән билдәләйҙәр. Был һүҙ беҙҙең районда ҡулланылмай, архаизм был тип, кире ҡағалар. Йәки, беҙҙең ауылда, районда ҡулланыла тип, әҙәби телгә индереү кәрәклеген талап итәләр һәм индереп ебәрәләр. Шул арҡала теге йәки был диалектҡа генә хас һүҙҙәр инеп китә. Шунан һуң беҙҙә берәй терминдең, һүҙҙең әҙәби телгә алынырға тейешлеген, ул һүҙ халҡ телендә осрай, тигән дәлил менән иҫбат итергә тырышыуҙар булғылай. Теге йәки был һүҙ халҡтың һөйләү телендә табылырға мөмкин, ләкин был ғына әле ул һүҙҙе әҙәби телгә алырға хоҡуҡ бирмәй. Башҡорт хеҙмәтсәндәренең күпселеге тарафынан ҡулланыламы, юҡмы — бына төп нәмәнән сығып хәл итергә кәрәк. Мәҫәлән, һөйләү телен тикшергәндә, «арал» тигән һүҙ осрай, ләкин ул һүҙҙе күпселек белмәй, бөтөнләй онотолоп бөтөп бара, уның урынына күпселек телендә «утрау» тигән һүҙ йөрөй, һәм ул һүҙ әҙәби телгә күптән инеп тә киткән. Халҡ телендә бар тип, «утрау» һүҙен «арал» һүҙе менән алыштыра алмайбыҙ.

Архаизм тураһында һүҙ барғанда, тағы бер моментте асыҡлап китергә кәрәк: бер һүҙҙе минең белмәүем — ул һүҙҙе архаизмдәр иҫәбенә индерергә хоҡуҡ бирмәй. Мәҫәлән: беҙҙең әҙәби телгә инмәгән, ләкин һөйләү телендә көн дә ишетергә тура килгән бик күп һүҙҙәр бар. Шул һүҙҙәрҙе теге йәки был иптәштең ишеткәне юҡ икән, уларҙы белмәй икән, шуға ҡарап ҡына уларҙы архаизмдәр, тип әйтеп булмай. Күпселектең ҡулланылыуынан сыҡҡан һүҙҙәр генә архаизмдәр булалар.

Үрҙә беҙ һөйләү теленән әҙәби телгә һүҙҙәр алғанда, диалектизмгә урын бирелергә тейеш түгел, тинек. Мәсьәләнең был рәүештә ҡуйылышы, айырым диалекттәрҙән алынып, хәҙерге әҙәби телгә инеп урынлашҡан һүҙҙәрҙе алып ташларға кәрәклекте аңлатмай, шулай уҡ был — производство процесе менән бәйләнешле рәүештә айырым райондарҙа барлыҡҡа килгән һүҙҙәрҙе термин итеп алмаҫҡа тигән мәғәнәне лә бирмәй. Сөнки ҡайһы бер производство процесе бер йәки бер нисә райондағы халҡтарға ғына хас булып, бүтәндәрҙә булмаҫҡа мөмкин. Шуның өсөн әҙәби телдә производствоның был тармаҡтары буйынса терминдәр тыуҙырғанда, уларҙы алыу мөмкинлегенә юл ҡуйырға кәрәк. Мәҫәлән, урман хужалығына, төҫлө металлургияға бәйле терминдәр.

Фәнни-техник, социал-политик интернациональ терминдәр әҙәби телгә ҡыйыу рәүештә алынырға тейештәр. Бында шуны хәтерҙән сығарырға ярамай, беҙ интернациональ терминдарҙе рус әҙәби теле аша, рус әҙәби телендә ҡабул ителгән формала алабыҙ. Рус әҙәби теле Советтәр Союзы ысынбарлығында интернациональ телгә әйләнде, Советтәр Союзында йәшәүсе бөтә миллаттар рус телен үҙҙәренең икенсе әсә теле итеп иҫәпләйҙәр. Рус әҙәби теле Советтәр Союзында йәшәүсе халҡтарҙың телдәрен интернациональ терминдарға, һүҙҙәргә байытыу менән бер рәттән, хәҙерге ваҡытта бөтә донъя телдәренә ингән бик күп интернациональ терминдәр һәм һүҙҙәрҙе үҙе лә тыуҙырҙы һәм тыуҙыра. Мәҫәлән: совет, большевик, колхоз, совхоз һ. б. донъяла беренсе тапҡыр беҙҙә, Россияла, эшсе-крәҫтиән власе — Советтәр власе төҙөлдә. «Бына ни өсөн, — ти Ленин, — бөтә илдәрҙәге буржуазия вәкилдәренең Россия өҫтөнә ниндәй генә ғәйбәттәр ташлауҙарына ҡарамаҫтан, «совет» һүҙе донъяның бөтә ерендә эшселәр өсөн, хеҙмәтсәндәр өсөн аңлайышлы була башланы ғына түгел, популяр ҙа, һөйкөмлө лә була башланы» (XXIV том, 201-се бит). Шулай итеп, рус теленең хеҙмәте, роле беҙҙең әҙәби телде Көнбайыш Европа телдәренән алынған интернациональ һүҙҙәргә байытыу менән генә сикләнмәй, ул беҙҙең әҙәби телдең лексикаһын үҙ һүҙҙәре иҫәбенә лә бик ныҡ байыта. Хәҙерге башҡорт әҙәби теленә социалистик төҙөлешкә бәйле төшөнсәләрҙе аңлатҡан бик күп һүҙҙәр рус теленән инделәр һәм инә баралар.

Бында, әлбиттә, варваризмгә урын бирелергә тейеш түгел. Мәҫәлән: отмирать итеү, отменять итеү. Һөйләү теленең стихияһына ла бирелергә ярамай. Ҡайһы бер кешеләр, мәҫәлән, мин уның бөтәһен да рассказать не стану, потому что ул длинная история, тип һөйләйҙәр. Әҙәби телдең лексик нормаһын билдәләүҙә, әлбиттә, уларға ориентация яһап булмай.

Рус әҙәби теле аша ингән һүҙҙәрҙе алғанда, беҙ һүҙҙе тамыр йәки нигеҙ хәлендә алабыҙ. Был принцип киләсәктә лә һаҡланырға тейеш. Башҡорт теленең грамматика төҙөлөше законДарына буйһондоролоп, рус теленән ингән исемдәр шул тамыр йәки нигеҙ формаларында шартлы сифат функцияларында ҡулланылырға тейештәр: информация бюроһы, республика кәңәшмәһе, Совет власе, большевиктәр партияһы, Октябрь революцияһы, государство банкыһы, общество милке, агитация эше, промышленность районы, революция хәрәкәте, һ. б. Исемдәрҙе тамыр хәлендә сифат функцияһында ҡулланыу мөмкин булмаған урындарҙа ик, аль, ив, он ялғауҙары ҡушыла: Социалистик революция һ. б. «Ик», «тик», «он» ялғауҙары алғанса, нигә рус теле ялғауҙарын алмайбыҙ, тейеүселәр булыр. Был мәсьәлә рус телендәге род менән бәйләнгән. Беҙҙең телдә грамматик категория булған род юҡ, шуның өсөн беҙ мужской род формаһында ғына алып, руссала Социалистическое государство, социалистическая промышленность тип йөрөтөлгән һүҙҙәрҙе Социалистический государство, социалистический промышленность тип йөрөтөргә тейеш булаcаҡбыҙ. Был хәл русса грамотаһыҙлыҡ таратыуға ғына сәбәп буласаҡ.

Хәҙерге көндә әҙәби телгә инеп киткән верховный, рядовой, боевой кеүек сифаттар үҙгәртелмәйенсә алыналар: Верховный Совет, Верховный суд, боевой бурыс, рядовой ҡыҙыл армеец һ. б. Киләсәктә лә, тамыр йәки нигеҙ хәлендә ҡулланырға мөмкин булмаған урындарҙа был форма сифаттарҙы алыуға юл ҡуйылырға тейеш. Күптән телгә инеп урынлашып, аҙаҡтары «и» менән әйтелеп йөрөгән бер нисә сифат бар, улар шул көйөнсә ҡалалар: варшавский карауат, венски ултырғыс.

Ҡылымдар ҙа шулай уҡ рус теленән ингән тамыр йәки [...] исемгә беҙҙең телдең ялғау[ҙарын] ҡушып һәм, айырым ваҡыт[тарҙа] ярҙамлыҡ ҡылымдар ҡушып [...]на: мобилизациялау, колле[ктив]лаштереү, стабиллаштереү, [...]нализация яһау, редакторла[у] итеү.

Ҡыҫҡартып әйтелгән учре[жде]ние, ойошма исемдәре, ағы[мдағ]ы лай ҡыҫҡартылған формала [ҡул]ланырға тура килһә, [...] ителмәй алыналар: Обком, [...]ком, горком, райсовет, [...] Ләкин учреждение, ойошма [...]дәре матбуғатта тулы [...] яҙып йөрөтөлергә тейе[ш]: ВКП(б) Өлкә Комитете, Өфө [...] Советы, ВКП(б) Ленин рай[он] түгел — ВКП(б)-ның Өфө Л[енин] район Комитете һ. б.

Башҡорт халҡы бик б[...] рус халҡы менән ныҡ ара[лашып] бергә йәшәгәнлектән, бик [...] һүҙҙәре, күптән башҡорт [...] инеп, әйтелеш формаларын [...]теп, үҙләшеп киткәндәр. Б[...] һүҙҙәр халҡ телендә урын[...] формаларында алыналар: [...] уыр, карауат, кәбеҫтә һ. б.

Башҡорт әҙәби теленең [лексик] нормаһын билдәләүҙең төп [прин]циптәре, беҙҙең фекеребеҙ[се]нә ошолар булырға тейеш. [...] йыл булып үткән беренсе [...] тел конференцияһы тар[афынан] ҡабул ителгән принциптар [...]геҙҙә, шуларға ҡайтып [...]

Ҡ. [...]

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-[..], промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00775 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 114
9
июнь
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Совет искусствоһы деятелдәренә СССР халҡ артисы тигән почетлы исем биреү тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһын саҡырыу тураһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).
Ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш— юғары урожай өсөн көрәш. (1-се бит).
В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл. СССР Ҙур театрында тантаналы ултырыш. (1-се бит).
Ғ. Исмәғилов. — Государство тураһында марксистик-ленинсе учение. (2-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. Ш. Вәлишин: — Етәксе кадрҙарҙы политик яҡтан тәрбиәләү — көндәге мөһим бурыс. (3-сө бит).
Беҙҙең республикала (3-сө бит).
Ишембай — Ермолаевка тимер юлы — халҡ төҙөлөшө. (3-сө бит).
Б. Сафин. — Бөтә эшселәрҙе лә алдынғылар кимәленә күтәрергә. (3-сө бит).
Англия-Америка разведчиктарының яңы провокацияһы. (4-се бит).
Румыния хөкүмәтенең коммюникеһы. (4-се бит).

Сәсеүлектәргә—өлгөлө тәрбиә

— Сәсеү тамамланды, лакин звенолар баҫыуҙан ҡайтманылар, — тиҙәр Туймазы районының «Яңы таң» һәм «Ҡарлығас ҡыуаҡ» колхоздарында. Шул уҡ районның «Бүләк тау» колхозында яҙғы сәсеүҙе юғары агротехник кимәлдә һәм өс көн срокта үткәргән Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле Мәғфирә Яҡупова звеноһы үҙ участкаларындағы ужым һәм һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлектәрен май айында уҡ ҡый үләндәренән таҙартты. Янауыл һәм Дәүләкән райондарының күпселек колхоздарында ла звенолар яҙғы баҫыу эштәрен тамамлау менән уҡ сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенә тотондолар. Баҡалы һәм Ҡандра райондарында ла сәсеүлектәрҙе утау киң йәйелдерелде. Стәрлебаш районы колхоздары 3200 гектар майҙанда ужым сәсеүлектәрен тәүге тапҡыр утауҙы тамамланылар.

Алдынғы звеноларҙа, бригадаларҙа, колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙең юғары урожай өсөн көрәштә яуаплы осор икәнен бик яҡшы аңлайҙар. Шуға күрә лә уларҙа яҙғы сәсеү ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә тамамланыу менән сәсеүлектәргә тәрбиә эше ойоштороло. Күп көс һалып эшкәртелгән баҫыуҙарҙа тупраҡтағы бөтә дымды культуралы сәсеүлектәргә генә бирергә кәрәк. Дымды һаҡлау, уны дөрөҫ файҙаланыуҙы тәьмин итеү быйылғы ҡоролоҡло шарттарҙа айырыуса әһәмиәткә эйә. Бына шуның өсөн дә ҡый үләндәренең ҙур булып үҫеүҙәрен көтөп тормаҫтан, уларҙы утарға, сәсеүлектәрҙе таҙа тоторға кәрәк.

Сәсеүлектәрҙең үҫеүҙәрен көсәйтеү өсөн тупраҡтағы дым ғына етмәй, уларҙы өҫтәмә аҙыҡландырыу ҙа талап ителә. Алдынғы колхоздар был агротехник сараны киң ҡулланалар. Әлшәй районының Антонов исемендәге колхозында Нина Саламатина звеноһы ужым бойҙайы сәсеүлектәрен минераль һәм урындағы ашламалар менән өҫтәмә аҙыҡландырҙы. Был колхозда шулай уҡ 53 гектар арыш майҙанында утау, тупраҡты йомшартыу һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу саралары үткәрелде. Бәләбәй районы Карл Маркс исемендәге колхоздың звеноводы, Социалистик Хеҙмәт Геройы Ғиниәт Насиров йыл һайын сәсеүлектәрҙе яҙҙан алып көҙгә тиклем тәрбиәләүҙе даими рәүештә алып бара.

Юғары урожай мастерҙарының сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙәге эш тәжрибәләрен республиканың бөтә колхоздарында ла ҡулланырға кәрәк. Ләкин уға әле күп урындарҙа иғтибар ителмәй. Хәйбулла районының күп кенә колхоздарында хатта орлоҡ участкаларындағы ужым һәм һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлектәрен ҡый үләндәре ҡаплаған. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү осоронда орлоҡсолоҡ звеноһының роле тағы ла артырға тейеш булыуға ҡарамаҫтан, сәсеү тамамланыу менән звенолар таратылғандар. Шишмә районының колхоздарында ла баҫыуҙарҙы ҡый үләндәре ҡаплаған, утау ойошторолмай, колхозсылар был эшкә ылыҡтырылмай.

Сәсеүлектәрҙе даими тәрбиәләү юғары урожай өсөн көрәштең мөһим сараһы икәнен оноторға ярамай. Быйыл һабан ашлыҡ культуралары өсөн күпселек майҙандың яҙ һөрөлөүе һәм һауа шарттарының оҙаҡ ваҡыт ҡоро тороуы баҫыуҙарҙа ҡый үләндәренең күп һәм йәһәт ҡалҡыуҙарына мөмкинлек бирҙе. Шулай уҡ быйыл һәр бер колхозда, звенола сәсеү майҙаны, үҙған йылдарға ҡарағанда, байтаҡ киңәйҙе. Быларҙың бөтәһе лә һис кисекмәҫтән сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә, беренсе нәүбәттә утауға бөтә колхозсылар массаһын туплауҙы талап итә. Утау эшенә яраҡлы бөтә ҡарттар ҙа, мәктәптән бушаған балалар ҙа бөгөндән баҫыуҙа булырға тейештәр. Бөтә эш индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщина, киң йәйелдерелгән социалистик ярыш нигеҙендә бөтә колхозсыларҙың актив ҡатнашлығында алып барылһын. Баҫыуҙарҙа бер генә ҡый үләне лә ҡалдырылмаһын.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү утау эше менән генә бөтмәй әле. Совет агротехникаһы сәсеүлектәр, бигерәк тә пропаш культуралар майҙанында, рәт араларын йомшартыу һәм өҫтәмә аҙыҡландырыу сараларын да ваҡытында үткәреүҙе талап итә. Арыш, көнбағыш, тары, ҡара бойҙай һәм люцерна сәсеүлектәрен яһалма һеркәләндереү саралары ла ваҡытында үткәрелергә тейеш. Шулай уҡ сәсеүлектәрҙе һуғарыу эшен ойоштороуҙың быйыл айырыуса әһәмиәтле икәнен оноторға ярамай. Беҙҙә йылғаларҙың һәм күлдәрҙең күп булыуы был эште ойошторорға ҙур мөмкинлектәр бирә. Звенолар, бигерәк тә орлоҡсолоҡ һәм баҡсасылыҡ звенолары, һуғарыу эшен ойоштороуҙа инициатор булырға тейештәр. Һуғарыу — сәсеүлектәрҙең урожайын арттырыуға йүнәлтелгән мөһим сара.

Ауыл хужалығы ҡортҡостарына ҡаршы көрәш быйыл шулай уҡ айырыуса мөһим. Баҫыуҙарҙа ҡый үләндәренең күбәйеүе һәм һауа шарттарының оҙаҡ ҡоро тороуы уларҙың күбәйеүенә уңайлы шарттар тыуҙырҙы. Шуның өсөн һәр бер районда, колхозда һәм звенола сәсеүлектәрҙе һаҡлауҙы ойошторорға һәм ауыл хужалығы ҡортҡостары күренеү менән уҡ уларға ҡаршы көрәш башларға кәрәк. Район ауыл хужалығы бүлектәре, МТС, колхоз һәм совхоз агрономдары сәсеүлектәрҙе һаҡлау һәм даими тәрбиәләү өсөн яуаплы булыуҙарын бер генә минутҡа ла оноторға тейеш түгелдәр.

Сәсеүлектәрҙе һаҡлау һәм даими тәрбиәләү юғары урожай өсөн көрәштә бөгөнгө иң мөһим бурысы. Был бурысты уңышлы үтәү — үҙ юлбашсыбыҙ бөйөк Сталинға яҙған хатыбыҙҙа бирелгән вәғәҙәбеҙҙе үтәү өсөн көрәш булып тора.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһын саҡырыу тураһында

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЫ ПРЕЗИДИУМЫ УКАЗЫ

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының нәүбәттәге икенсе сессияһын 1948 йылдың 15 июнендә Өфө ҡалаһында үткәрергә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретары Ә. БИКТИМИРОВ

Өфө ҡалаһы.
7 июнь 1948 йыл.

Ҡаҙанғол орлоҡсолоҡ совхозы алдынғыларына наградалар тапшырылды

5 июндә БАССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Ғ. В. Ниғмәтжанов 1947 йылда арыштан юғары урожай алғандары өсөн наградланған Ҡаҙанғол орлоҡсолоҡ совхозы алдынғыларына СССР Верховный Советы Президиумы исеменән наградалар тапшырҙы.

Совхоз директоры М. М. Ҡурамшин һәм совхоздың өлкән механигы И. З. Арютин иптәштәргә Ленин ордендәре тапшырылды. Бригадалары бригадирҙары П. А. Лапонов һәм И. Г. Чихота иптәштәр Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордендәре алдылар.

Иптәш Ҡурамшин наградланыусылар исеменән сығыш яһап, совхоз работниктарының эштәрен юғары баһалауҙары һәм ауыл хужалығы работниктары тураһында ҙур хәстәрлек күрһәтеүҙәре өсөн Совет Хөкүмәтенә, большевиктар партияһына, иптәш Сталинға рәхмәт әйтте һәм совхоз работниктарының киләсәктә лә юғары урожай алыу өсөн арымай-талмай көрәшәсәктәрен белдерҙе.

В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл

СССР Ҙур театрында тантаналы ултырыш

Өсөнсө көн, 7 июндә, бөйөк революцион демократ, гениаль фекер йөрөтөүсе, ялҡынлы публицист һәм тәнҡитсе Виссарион Григорьевич Белинскийҙың үлеүенә йөҙ йыл тулды. СССР Союзының Ҙур театрында уның иҫтәлегенә арналған тантаналы ултырыш үткәрелде. Залға ғалимдар, яҙыусылар, Мәскәү предприятиеларының стахановсылары, туғандаш республикаларҙың вәкилдәре йыйылдылар. Сәхнә уҙәгендә — ҙур, сәскәләргә биҙәлгән, В. Г. Белинский портреты.

Ултырыш президиумында—А. А. Фадеев, В. П. Волгин, М. Т. Айбек, Н. Ф. Бельчиков, И. Г. Большаков, С. И. Вавилов, А. А. Вознесенский, А. С. Гундоров, А. М. Еголин, В. В. Ермилов, Л. Ф. Ильичев, С. В. Кафтанов, И. А. Каиров, С. М. Бухало, П. И. Лебедев, Г. Н. Леонидов, Л. М. Леонов, Н. А. Михайлов, М. В. Нечкина, И. А. Парфенов, П. Н. Поспелов, М. И. Родионов, В. Н. Черноусов, Д. Т. Шепилов, И. В. Шикин, А. А. Яблочкина, Н. С. Тихонов, А. В. Сафронов һәм башҡалар.

Ултырышты В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл тулыу көнөн үткәреү буйынса Бөтә Союз Комитетының председателе урынбаҫары — академик В. П. Волгин аса.

— Беҙ, бөйөк Сталиндең уҡыусылары һәм осорҙаштары, — ти академик Волгин, — беҙҙән ваҡыты менән алыҫ, ләкин үҙенең революцион рухы буйынса яҡын торған «ярһыулы Виссарионды», үҙ соратнигебеҙ итеп, мөхәббәт хисе һәм милли ғорурлыҡ менән иҫкә алырға бөтә яҡтан хаҡлыбыҙ.

Ултырышҡа почетлы президиум һайларға тәҡдим индерелә. Ултырышта ҡатнашыусылар ҙур рухланыу менән, почетлы президиум составына, башында И. В. Сталин торған хәлдә, ВКП(б) Үҙәк Комитетының Политбюроһын һайлайҙар.

«Белинский һәм беҙҙең осоробоҙ» тигән темалағы доклад өсөн СССР Совет яҙыусылары Союзының генеральный секретары А. А. Фадеевҡа һүҙ бирелә.

Кисәнең художество өлөшөндә «В. Г. Белинский» тигән документаль фильм күрһәтелде. Унан һуң концертта башҡаланың иң яҡшы артистары ҡатнаштылар. (ТАСС).

Өфөлә Белинскийҙы иҫкә алыу йыйылышы

7 июндә БАССР Министрҙар Советының ҙур залында Өфө ҡалаһының партия, совет һәм общественный ойошмаларының бөйөк рус революцион демократы һәм тәнҡитсеһе В. Г. Белинскийҙың үлеүенә 100 йыл тулыу көнөнә арналған йыйылыш булды.

Йыйылышта Белинский һәм бөйөк рус әҙәбиәте темаһына философия фәндәре кандидаты иптәш Масленников доклад яһаны.

Докладтан һуң йыйылышта ҡатнашыусылар өсөн ҙур концерт булды.

Финляндия журналистары делегацияһының Мәскәүгә килеүе

Сит илдәр менән культура бәйләнеше Бөтә Союз Обществоһының саҡырыуы буйынса 6 июндә Мәскәүгә Финляндия журналистарының делегацияһы килде. Делегацияның составында түбәндәге кешеләр бар: А. Вахтера — Финляндия телеграф агентствоһы директорының урынбаҫары, Р. Пальмгрен — «Вапаа Сана» газетаһының баш редакторы, Л. Ахо — «Ууси Суоми» газетаһының баш редакторы, А. Грэнвик — «Нью Прессен» газетаһының баш редакторы, Л. Хиеккала — «Хельсингин Саномат» газетаһының редакторы, А. Тимонен — «Тюэкансан Саномат» газетаһының редакторы, П. Никкиля — «Кансан Тахто» газетаһының баш редакторы, О. Брусиини «Сис» газетаһының редакторы.

Делегацияны Ленинград вокзалында ВОКС правлениеһы члендары Л. Д. Кислова һәм ВОКС-тың яуаплы сотрудниктары, шулай уҡ Финляндияның Мәскәүҙәге миссияһының беренсе секретары Ваанио әфәнде һәм башҡалар ҡаршы алдылар.

Ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш—юғары урожай өсөн көрәш

Звеноларҙан хаттар

Баҫыуҙа берҙәм эшләйҙәр

Янауыл районы «Коммунар» колхозының иптәш Гәрәйшина етәкселек иткән звеноһы үҙған йыл 10 гектар майҙанда арыштың һәр бер гектарынан 24-әр центнер урожай алғайны.

Үҙған йылғы тәжрибәләрҙән сығып, звено члендары быйыл тағы ла ҙурыраҡ йөкләмәләр алдылар. Улар 76 гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 25-әр центнер урожай алыу өсөн көрәшәләр.

Сәсеү бөтөү менән уҡ звено члендары утауға төштөләр. 28 гектар арыш һәм күп кенә башҡа культуралар утаплды. Бойҙай культураһы бер нисә тапҡыр ҡый үләндәренән таҙартыласаҡ. Звено пар һөрөүҙе лә колхозда беренсе булып тамамланы. Был эш үҙған йылға ҡарағанда күп иртә үткәрелде. Пар һөрөүҙә һабансыларҙан Тимершин, Хатмуллин иптәштәр көндәлек эш нормаларын 130—140 процентка үтәйҙәр.

«Урал» колхозының звенолары ла сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, пар һөрөүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн үҙ-ара ярышып эшкә башланылар. Асия Сафина звеноһы ярышта алда бара. Ул 20 гектар майҙанда пар һөрөүҙе уңышлы үткәрҙе. Пар ергә һөрөү алдынан 23 тонна тиреҫ сығарылды. Звено һабан ашлыҡтарын аҙыҡландырыуҙы ла киң ҡуллана. Был эштә звено члендарынан Нурышев, Карамова иптәштәр айырыуса яҡшы эшләйҙәр.

Звеновод иптәш Сафина ошо көндәрҙә генә Учалы рудникгында эшләүсе комсомолецтарҙан хат алды. Улар үҙҙәренең был хаттарында рудник комсомолецтарының һәм йәштәренең биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн нисек көрәшеүҙәре, июнь айы программаһын май айында уҡ үтәүҙәре тураһында яҙалар һәм звено члендарын колхоз баҫыуҙарында юғары урожай үҫтереп алырға саҡыралар.

Колхоз йәштәре был саҡырыуға баҫыуҙарҙа стахановсы эш менән яуап бирәләр. **М. Фәтихов.**

Бөтә көсөбөҙ менән

Юғары урожай үҫтереү өсөн көрәштә беҙ бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта әйтелгән вәғәҙәбеҙҙе үтәү өсөн бөтә көсөбөҙ менән эшләйбеҙ. Беҙҙең звено яҙғы сәсеүҙе өс көн эсендә, юғары агротехник кимәлдә тамамланы. Хәҙер бөтә көс сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә тупланды.

Яҙ өҫтәмә аҙыҡландырылған һәм тырматылған 21 гектар арыш бик яҡшы үҫә. Май айында беҙ уны тәүге тапҡыр утаныҡ. Шулай уҡ 28 гектар һабан ашлыҡ культуралары майҙанында ла утау үткәрелде. Хәҙер бөтә сәсеүлектәр ҡый үләндәренән таҙартылды.

Пар тик май айында тына һөрөлдө. Хәҙер звено члендары пар ерҙәрен артабан эшкәртеү һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәрен алып баралар. Звенолағы 14 кешенең бөтәһе лә юғары урожай үҫтереү өсөн тырышып эшләй. Беҙ үҙ йөкләмәбеҙҙе намыҫ менән үтәрбеҙ, звеноға беркетелгән участкала юғары урожай үҫтерербеҙ.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле **Мәғфирә Яҡупова,**

Туймазы районы «Бүләк тау» колхозының звеноводы.

Массовый рәүештә утау эштәре башланды

Ҡандра районы игенселәре һәм механизаторҙары 5 июнгә сәсеү планын үтәнеләр. Бөтәһе 21 мең 230 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәселде. Бойҙай сәсеү майҙаны үҙған йылға ҡарағанда 4 мең 850 гектарға арттырылды.

Хәҙер бөтә көс сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүгә һәм пар һөрөүгә тупланды. Колхоздарҙа массовый рәүештә утау эштәре бара. «Ҡыҙыл өсөн» колхозында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәре айырыуса яҡшы ойошторолған. Бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр бер гектарынан кәмендә 100-әр бот урожай алырға һүҙ биргән иптәш Сәүиә Мостафина етәкселек иткән звено беренсе тапҡыр утауҙы тамамланы.

«Көрәш» колхозында утауҙа көн һайын 180—200 кеше эшләй. Һәр бер звено үҙ участкаһын ҡый үләндәренән таҙарта. Был колхоз 5 июнгә 300 гектар майҙанда утау үткәрҙе.

«Ҡыҙыл балыҡсы», «Ҡайын күл», «Өс ҡайын», «Трактор» колхоздарында ла утау эштәре ҡыҙыу темп менән бара. **Ғ. Ғәзизуллин.**

Пар һөрөү планын үтәнеләр

Дәүләкән районы «Яңы таң» (председателе иптәш Солтанғолов), «Урта тау» (председателе иптәш Гәзиев), «Ҡыҙыл тормош» (председателе иптәш Хәбибнуров) һәм башҡа алдынғы колхоздар пар һөрөү планын арттырып үтәнеләр.

Дәүләкән МТС-ы коллективы пар күтәреүҙә колхоздар менән төҙөшкән договорҙы тулыһынса үтәү өсөн көрәшә. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехин етәкселек иткән трактор бригадаһы «Новая жизнь» колхозында пар һөрөүҙе 1 июнгә тамамланы. 150 гектар урынына, 175 гектар пар һөрөлдө. Каганович исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән Ленин орденле иптәш Жолобецкий бригадаһы, Салауат Юлаев исемендәге колхозды хеҙмәтләндергән Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ орденле иптәш Сәлимгәрәев бригадаһы пар күтәреү пландарын 100—110 процентка үтәнеләр.

Ғ. Идрисов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Буздаҡ районының «Суллан» колхозы яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы тамамлап, урожай йыйнауға әҙерлекте йәйелдерҙе. Тимерсе Хөснөтдин Гәрәев лобогрейкаларҙы ремонтлауҙа һәр көн норманы 160—175 процентка үтәй.
Һүрәттә: колхоз тимерсеһе иптәш Х. Гәрәев эш өҫтәндә.
М. Әхмәтьянов фотоһы.

Ремонт яҡшы ойошторолдо

Ҡандра МТС-ы коллективы быйыл тракторҙар паркын файҙаланыуҙы байтаҡ яҡшыртты. МТС колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үҙ ваҡытында үтәп бара. Яҙғы сәсеү осоронда МТС үҙе хеҙмәтләндергән колхоздарҙа 15 мең 252 гектар ер эшкәртергә тейеш ине. Был план срогында арттырып үтәлде. Шартлы һәр бер тракторға уртаса 206-шар гектар ер эшкәртелде. Мөхәмәтшин һәм Ғәбидуллин иптәштәрҙең трактор бригадалары айырыуса юғары күрһәткестәр бирҙеләр. Иптәш Мөхәмәтшин етәкселек иткән трактор бригадаһы шартлы һәр бер тракторға 292-шәр гектар ер эшкәртте. Иптәш Ғәбидуллин етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы ла сәсеү планын 122 процентка үтәне.

Механизаторҙар урожай йыйнауға әҙерлекте лә көндән-көн көсәйтә баралар. 5 июнгә 13 комбайн һәм 20 комбайн моторы ремонтланды. СССР Верховный Советы депутаты, республикабыҙҙың данлы комбайнеркаһы иптәш Рәйфә Баһауетдинова үҙ комбайнын МТС-та беренсе булып ремонттан сығарҙы. Комбайнерҙарҙан Ғафаров, Фарухшин иптәштәр ҙа ремонтта эш нормаларын 150—200 процентка үтәйҙәр. Слесарҙарҙан Сенегубов, Пауль иптәштәр стахановсы эш өлгөләре күрһәтәләр.

МТС-та комбайнер ярҙамсылары етештереү маҡсаты менән ике айлыҡ курс ойошторолдо. 15 июнгә был курсты 18 кеше тамамлап сығасаҡ.

С. Зәйруллин.

Совет искусствоһы деятелдәренә СССР халҡ артисы тигән почетлы исем биреү тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

Искусство өлкәһендә күренекле ижади өлгәшеүҙәре өсөн түбәндәге кешеләргә СССР халҡ артисы тигән почетлы исемде бирергә:

Александров Григорий Васильевичҡа — кинорежиссерға,

Берсенев Иван Николаевичҡа — Мәскәүҙең Ленин Комсомолы исемендәге театрының художество етәксеһенә,

Васильев Сергей Дмитриевичҡа — кинорежиссерға,

Голованов Николай Семеновичҡа — Ҙур Государство Академия Театрының баш дирижерына,

Глебов-Сорокин Глеб Павловичҡа — Белоруссияның Янка Купала исемендәге Государство драма театрының художество етәксеһе һәм артисына,

Даугуветис Борис Францевичҡа — Литваның Вильнюс Государство театрының художество етәксеһенә,

Завадский Юрий Александровичҡа — Моссовет исемендәге театрҙың художество етәксеһенә,

Кедров Михаил Николаевичҡа— СССР-ҙың М. Горький исемендәге Мәскәү Государство Художестволы Академия театрының художество етәксеһенә,

Лаутер Антс Михкелевичҡа — «Эстония» Государство театрының художество етәксеһе һәм артисына,

Охлопков Николай Павловичҡа — Мәскәү драма театрының художество етәксеһенә,

Попов Алексей Дмитриевичҡа — Совет Армияһының Үҙәк театрының художество етәксеһенә,

Пудовкин Всеволод Илларионовичҡа — кинорежиссерға,

Пырьев Иван Александровичҡа — кинорежиссерға,

Рахлин Натан Григорьевичҡа — Украина ССР-ҙың симфоник оркестрының художество етәксеһенә,

Смильгис Эдуард Яновичҡа — Латыш ССР-ы Государство художество театрының художество етәксеһенә,

Чиаурели Михаил Эдишеровичҡа — Тбилиси киностудияһының режиссеры, художество етәксеһенә,

Эрмлер Фридрих Марковичҡа— кинорежиссерға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретары А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль. 5 июнь 1948 йыл.

Государство тураһында марксистик-ленинсе учение*

Капиталдың хөкөм һөрөүенә ҡаршы хеҙмәтсән синыфтарҙың көрәшендә государство тураһында Маркс—Энгельс—Ленин—Сталин учениеһе көсөтлө ҡорал булып тора.

Государство тураһындағы мәсьәлә — политик һәм практик яҡтан ҙур әһәмиәтле, айырыуса мөһим теоретик мәсьәлә ул.

Буржуазияның государство тураһындағы учениелары, тип күрһәтте Ленин, капитализмде, эксплоатацияны аҡлау өсөн хеҙмәт иткән, эшселәрҙең синфи аңдарын томалайҙар, уларҙың иғтибарҙарын капиталистик королошҡа ҡаршы көрәштән ситкә борорға тырышалар. Улар, государство, йәнәһе, мәңге йәшәп килде һәм ул һәр төрлө общественный королоштоң кәрәкле формаһы булып тора, тип йәнәһе государствоның синыфтарҙан өҫтөн характеры бар, тип инсек кенә булһа ла «иҫбат итергә» тырышалар, йәғни государствоның синфи асылын боҙоп күрһәтергә маташалар.

Государствоны синыфтарҙан өҫтән тип контрреволюцион аңлатыуға ҡаршы көрәшеп, марксизм-ленинизм буржуазия ғалимдәренең ялған теорияларын аҙағына тиклем фаш итте, эшселәрҙе һәм хеҙмәтсәндәрҙе государство тураһында яңы революцион теория менән ҡоралландырҙы.

* * *

Был мөһим мәсьәләгә фәнни рәүештә яҡын килер өсөн, государствоның инсек килеп сығыуы һәм инсек үҫеүе менән танышырға кәрәк. Энгельс «Семьяның, хосуси милектең һәм государствоның килеп сығыуы» тигән үҙенең китабында, государство мәңге йәшәп килмәй ул, тип күрһәтте. Унан башҡа ла көн күргән һәм государство власе тураһында төшөнсәләре лә булмаған обществолар ҙа йәшәгәндәр. Обществолың синыфтарға бүленеү менән котолғоһоҙ рәүештә бәйле булған билдәле бер экономик үҫеш баҫҡысында, был бүленеш арҡаһында государство төҙөү кәрәк булды, тип күрһәтә ул.

Государство синыфтар ҡаршылығын теҙгенләп тотоу кәрәкле генән килеп тыуған икән, шул ваҡыттарҙа уҡ ул ошо синыфтарҙың бәрелешеүҙәре эсендә килеп тыуған икән, ул, дөйөм ҡағиҙә буйынса экономик яҡтан хакимлек итеүсе иң көсөтлө синыф государствоһы булып тора: ул синыф государство ярҙамында шулай уҡ политик яҡтан да хөкөм һөрөүсе синыф булып әүерелә һәм, шулай итеп, иҙелгән синыфты баҫылдырыу һәм эксплоатациялау өсөн яңы средстволар таба, тип күрһәтә Энгельс.

Бөтә синфи формацияларҙа политик власть экономик хакимлек итеүсе синыф ҡулында булғанлығын тарих дәрәҫләй.

Боронғо государство — ҡол биләүселек государствоһы — ҡолдарҙы иҙеү һәм эксплоатациялау ҡоралы булған. Урта быуаттарҙа эре ер биләүселәрҙең крепостной крәҫтиәндәр өҫтөнән хакимлек итеүҙәре органы булып феодаль государство алға сыға. Капиталистик обществола государство буржуазия диктатураһы, пролетариатты иҙеү ҡоралы булып тора.

Иптәш Сталин ВКП(б)-ның XVIII съезында былай тине: «Государствоның эшмәкәрлеген төп ике функция: эске функция (башлыса функция) — эксплоатировать итеүсе күпселекте теҙгендә тотоу һәм тышҡы функция (башлыса булмаған функция) — үҙ синыфының, хакимлек итеүсе синыфтың территорияһын башҡа государстволар территорияһы иҫәбенә киңәйтеү йәки үҙ государствоһының территорияһын башҡа государстволарҙың һөжүмдәренән һаҡлау функциялары характерлай. Ҡол биләүселек королошо һәм феодализм ваҡытында эш шулай булды. Капитализм ваҡытында эш шулай тора». (Сталин, «Ленинизм мәсьәләләре», 11-се баҫма, 604-се бит).

Ҡол биләүселек обществолына тиклем эш башҡаса булған. Тәүтормош обществолында синыфтар һәм эксплоатация булмаған, шуға күрә, унда государство ла булмаған.

Тәүтормош обществолында ғөрөф-ғәҙәт, ҡәбиләләге аҡһаҡалдарҙың авторитеты, уларҙы хөрмәт итеү ғәҙәте хакимлек иткән.

Энгельс «Семьяның, хосуси милектең һәм государствоның килеп сығыуы» тигән үҙенең әҫәрендә хосуси милкселектең, синыфтарҙың һәм государствоның килеп сығыуы процесенә ентекләп туҡтала. Берғәләшеп, коллектив рәүештә хеҙмәт итеүҙән бөтөүҫ тәүтормош — общественный милектең тарҡалыуына килтерҙе һәм хосуси милекте тыуҙырҙы. Йорт хайуандарына (көтөүгә) һәм ергә хосуси милк барлыҡҡа килә. Байлыҡты ир балаға мираҫ итеү хоҡуҡы ныҡытыла.

Былар бөтәһе лә байлыҡтың аҙ ғына семьялар ҡулында, аҙсылыҡ ҡулында тупланыуы һәм халыҡтың күпселеген бойондороҡлоларға һәм ҡолдарға әйләндереү мөмкинлеген бирҙе. Һөҙөмтәлә синыфтар, ҡоллоҡ һәм, шулай булғас, государство барлыҡҡа килә. Ул ҡол биләү государствоһы була. Государство ҡол биләүселәр ҡулында була.

Государствоның төп функцияһы ҡолдарҙы теҙгендә тотоуҙан, ҡолдарҙың восстаниеләрен аяуһыҙ рәүештә баҫылдырыуҙан тора. Бынан тыш, ҡол биләүселек государстволары хакимлек итеүсе синыфтың территорияһын киңәйтер өсөн илбаҫарлыҡ һуғыштары алып баралар.

Ҡол биләүселек государстволарының формалары төрлө (монархия, республика, аристократия һәм демократия) була, ләкин эштең асылы бер үк булып ҡала: ҡолдарҙың һис бер төрлө хоҡуҡтары булмай һәм улар иҙелгән синыф булып ҡалалар, уларҙы кеше итеп танымайҙар.

Ҡол биләүселек үҙенең йәшәүенең беренсе осоронда, производство көстәренең хеҙмәт итеүе менән прогрессив булһа, артабан инде ул был үҫешкә кәртә булып әйләнә, шуға күрә үҙенең һуңғы көндәрен кисерә башлай.

Ҡолдарҙың восстаниелары һәм революциялары ҡол биләүселек системаһының кризисен көсәйтә, был королошҡа иң киткес көслө удар яһай, ҡол биләүселек системаһын юҡҡа сығара.

Ҡол биләүселек королошона алмашҡа феодаль королош һәм уның менән бергә феодаль государство килә.

Хужалыҡтың феодаль системаһы общественный производство көстәре, общественный производство үҫешенең билдәле бер баҫҡысында мөмкин булған берҙән-бер система һәм законлы хәл булғанлығы аңлашыла.

Феодалдар, помещиктар государствоһы ерҙе феодаль милкселектә ныҡыта һәм шуны һаҡлай, крепостной хоҡуҡты һәм крәҫтиәндәрҙе помещиктарға баш эйергә мәжбүрләүҙе законлаштыра. Феодаль государство закондары помещиктарға крепостнойҙың шәхесенә хужа булырға, уларҙы көслөк юлы менән мәжбүр итергә киң хоҡуҡтар бирә.

Иптәш Сталин крепостной крәҫтиәндәрҙең хәлен ҡоллар хәле менән сағыштырып, былай тине: «Ҡоллоҡ замандында «закон» ҡол биләүселәргә ҡолдарҙы үлтерергә рөхсәт иткән. Крепостной тәртиптәр заманында «закон» крепостниктарға крепостнойҙарҙы «барыбер тик» һатырға ғына рөхсәт иткән».

Феодализм заманында эксплоатацияның иң киткес ҡатылыҡтар менән тормошҡа ашырылғанлығын тарихте өйрәнгәндә беҙ бик асыҡ күҙ алдына килтерәбеҙ. Феодаль государствоның тәртиптәренә, закондарына крәҫтиәндәрҙең риза булмағанлыҡтарын төшөнөү өсөн, Россияла крәҫтиәндәрҙең революцион сығыштарын күрһәтеү ҙә етә. Тап ана шул кешелекһеҙ закондар, феодаль власть вәкилдәренең йәберләүҙәре Болотников, Булавин, Степан Разин, Пугачев восстаниелары кеүек крәҫтиән һуғыштарының килеп сығыуҙарының сәбәпсеһе булдылар.

«Урта быуаттарҙа крепостнойлыҡ хоҡуҡы өҫтөнлөк тотҡан һәм унда ла государствоның формалары төрлө булған, һәм, гәрсә улар көсһеҙерәк булған булһалар ҙа, унда ла беҙ монархияны ла, республиканы ла күрәбеҙ, ләкин хакимлек итеүсе тип һәр ваҡыт бары помещиктар — крепостниктар генә танылғандар. Крепостной крәҫтиәндәр һәр төрлө политик хоҡуҡтар өлкәһенән бөтөнләй сығарып ташланған булғандар» (Ленин, XXIV том, 371-се бит).

Буржуаз революциялар феодаль крепостнойлыҡ королошон, феодалдарҙың синфи хакимлеген, феодаль государствоны юҡ иткән һәм уларҙы буржуаз государстволар менән алмаштырған.

Буржуаз государствоның феодаль государствонан айырмалы үҙенсәлектәре капиталистик производствоның һәм капиталистик эксплоатацияның үҙенсәлектәренән килеп сыға.

Буржуаз государство буржуазияның синфи хакимлек итеүенең ҡоралы булып барлыҡҡа килде һәм шуға күрә, ул массаларҙың, бөтәһенән дә бигерәк эшселәр синыфының революцион хәрәкәтен баҫтырып, капитал интерестарын хеҙмәтсәндәр тарафынан һәр төрлө «һөжүм яһалыуҙарҙан» һаҡлауҙы, шәхси милекте яҡлауҙы үҙенең беренсе, төп бурысы итеп ҡуя.

Буржуаз государствоның тышҡы функцияһы колонияларҙы, тауар сығарыу һәм сырьё алыу баҙарҙарын баҫып алыу политикаһын тормошҡа ашырыуҙан, үҙ территорияһын башҡа государстволарҙың һөжүмдәренән һаҡлауҙан тора.

* * *
Ғ. ИСМӘҒИЛОВ
ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете лекторы
* * *

Ҡол биләүселек, феодализм һәм капитализм замандарындағы государство формалары төрлөсә һәм улар төрлө формаларҙа көүҙәләнәләр, ләкин асылда власть хакимлек итеүсе синыфтар ҡулында ҡала.

* * *

«Государство, — ти иптәш Сталин, — обществолың дошман синыфтарға бүленеүе нигеҙендә барлыҡҡа килде — эксплоататор аҙсылыҡтың интерестарында эксплоатацияланыусы күпселекте теҙгендә тотор өсөн барлыҡҡа килде».

Шулай итеп, марксизм-ленинизм классиктары государствоны синфи ҡаршылыҡтарҙың килешмәүсәнлегенең продукты һәм көүҙәләнеше тип ҡараныҡлар.

Капитализм, феодализмға ҡарағанда, прогресс булды. Буржуазия абсолютизмға һәм феодаль-крепостнойлыҡ королошона ҡаршы үҙенең көрәшендә киң халыҡ массаларына таянды. Буржуазия абсолютизмға ҡаршы көрәшеп, халыҡ вәкилдәре принцибен — «законность», «тигеҙлек» урынлаштырыуҙы алға ҡуйҙы.

Халыҡҡа бер ни тиклем хоҡуҡ бирмәй, буржуазия, әлбиттә, феодализмде ныҡлы рәүештә еңеп сыға алмаҫ ине һәм үҙенең государствоһын барлыҡҡа килтерә алмаған булыр ине.

Һәр төрлө синфи государство кеүек үк, буржуаз государство ла синфи государство һәм хеҙмәтсәндәрҙе иҙеү өсөн ҡорал булып хеҙмәт итә.

Беҙҙең быуатта буржуазия революцион хәрәкәттең һәр төрлө күренешенә ҡаршы ҡоторонҡо көрәш алып бара.

Парламентаризм, дөйөм һайлау хоҡуҡы, йыйылыштар «азатлығы», һүҙ һәм матбуғат «азатлығы» — буржуаз демократияның бөтә был кәрталары буржуаз государство тарафынан бары тик буржуазия хакимлеге маҡсаттарына хеҙмәт иткән өсөн генә үткәрелә һәм шуға күрә генә уларға юл ҡуйыла.

Бынан йөҙ йыл элек Маркс менән Энгельс «Коммунистар партияһы манифесында» буржуаз государствоға бик дөрөҫ характеристика бирҙеләр. Улар: «Хәҙерге заман государство власе — ул бары тик бөтә буржуазияның дөйөм эштәренә идара итеүсе комитет кенә», — тип яҙҙылар. (71-се бит, 1938 йылғы баҫма).

Империализм — капитализмдең юғары стадияһы. Империализм эске политикала, шулай уҡ тышҡы политикала ла демократияны быуа, реакцияға ынтыла. АҠШ империализме быны асыҡ миҫалы булып тора, ул реакцион эске һәм тышҡы политика үткәрә, бөтә донъяла хакимлек итеү пландарын төҙөй. Империалистар социализм көстәренә ҡаршы үҙҙәренең көрәшендә эшселәр хәрәкәте эсендәге үҙҙәренең агенттарын файҙаланалар.

Империализм осоро, — тип яҙҙы Ленин үҙенең, «Государство һәм революция» тигән китабында, — «государство машинаһының» ғәҙәттән тыш көсәйеүен, монархистик илдәрҙә булһын, шулай уҡ иң азат тип аталған республикан илдәрҙә лә, пролетариатҡа ҡаршы репрессияларҙың көсәйеүе айҡанлы, уның хәрби һәм чиновниктар аппаратының бығаса ишетелмәгән дәрәжәлә үҫеүен күрһәтә.

Миҫалға Америка Ҡушма Штаттарында бюрократизмдең үҫеүе тураһында ҡайһы бер һандарҙы алайыҡ. 1910 йылға ҡарағанда 1920 йылда унда чиновниктар аппараты 171 процентҡа, ә 1930 йылда 199 процентҡа артҡан, шуның менән бергә, полиция аппаратының һаны ике тапҡырҙан да күберәккә артҡан. Икенсе бөтә донъя һуғышы йылдарында АҠШ-та государство аппаратының һаны 1,5 миллион кешегә артҡан.

Капиталистик обществола антогонистик ҡаршылыҡтар бары тик пролетариаттың социалистик революцияһы менән генә хәл ителә алалар һәм хәл ителергә тейештәр. Революция буржуазияның синфи хакимлеген ҡолата, капиталистик королошто юҡҡа сығара һәм коммунизмға алып бара.

* * *

Марксизм-ленинизм социалистик революция тураһындағы, уның еңеү юлдары тураһындағы, пролетариат диктатураһы тураһындағы учениене барлыҡҡа килтерҙе. Марксизм-ленинизм капитализмдән коммунизмға күсеү дәүерендәге государство тураһындағы учениене барлыҡҡа килтерҙе.

«Капиталистик общество менән коммунистик общество араһында, — тип яҙҙы Маркс, — революцион юл менән беренһен икенсеһенә әйләндереү осоро ята. Политик күсеү дәүере лә шуға тура килә, һәм был дәүерҙәге государство революцион пролетариат диктатураһы булмай, башҡаса булыуы мөмкин түгел». («Готский программаға критика» 22-се бит, 1937 йыл).

Билдәле, халыҡ власен урынлаштырыр өсөн иҫке государство власен емерергә кәрәк ине.

Маркс менән Энгельс 1848—1851 йылдарҙағы революция тәжрибәһен өйрәнеп, иҫке государство машинаһын ватырға кәрәк тигән һөҙөмтәгә килделәр.

Париж коммунаһы һабаҡтарына йомғаҡ яһап, Маркс менән Энгельс: «Эшселәр синыфы әҙер государство машинаһына ябай ғына эйә булып, уны үҙ маҡсаттарында хоҙҙа ебәрә алмай» тигән һығымтаға яһанылар.

1905 йылғы революция тәжрибәһе һәм бигерәк тә 1917 йылғы революция тәжрибәһе эшселәр депутаттары Советтен (1905 йыл) һәм әмсе, һалдат депутаттары Советен тыуҙырҙы, ул асылда, эшсе һәм крәҫтиәндәр депутаттары Советы булды.

Ике рус революцияһы тәжрибәһе нигеҙендә В. И. Ленин пролетариат диктатураһының государство формаһы рәүешендә Совет власен асыҡ итте.

Ленин былай тине: «Буржуаз-демократик парламентаризм осоро үтте. Бөтә донъя тарихенең яңы главаһы: пролетариат диктатураһы осоро башланды».

1917 йылдың Октябрендә пролетариат власте яулап алғас уҡ властен иҫке, буржуаз аппаратын ватыу һәм уны яңы, совет аппараты менән алмаштырыу башланды. Буржуаз государство власенең төп ҡоралы — иҫке армия һәм уның генералитеты юҡҡа сығарылды һәм, уның урынына, Ҡыҙыл Армия төҙөлдө. Эшселәр синыфы чиновниктар аппаратын һәм полиция, жандармерия аппаратын ватты һәм уны совет аппараты менән алмаштырҙы. Социалистик революцияны яҡлау өсөн боевой орган — ВЧК—ОГПУ төҙөлдө. Иҫке суд аппараты урынына яңы, совет суды төҙөлдө.

Еңеп сыҡҡан эшселәр синыфы буржуазияның һәм уның агентураһының ҡаршылығын киҫкен рәүештә баҫылдырып, банкыларҙы, фабрикаларҙы, заводтарҙы буржуазия ҡулынан тартып алды. Хужалыҡ тормошоноң иҫке аппараттарын емерҙе һәм уларҙы яңы, Совет аппараттары менән алмаштырҙы.

* * *

Государство тураһындағы марксистик-ленинсе учениене иптәш Сталин үҙ хеҙмәттәрендә артабан үҫтерҙе. 1926 йылдың башында уҡ әле иптәш Сталин, «пролетариат диктатураһының үҙенең дәүерҙәре, үҙенең айырым формалары, төрлө эш методтары бар», — тип күрһәтте.

Иптәш Сталиндең партияның XVIII съезында (1939 йыл) социалистик государство тураһында һөйләгән докладь уның «Диалектик һәм тарихи материализм тураһында» яҙған хеҙмәтендә әйтелгән идеяларының үҫтерелеше булып тора.

Социалистик королошто капиталистик королош менән сағыштырып иптәш Сталин, СССР-ҙа производство процесендә кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәре иптәштәрсә хеҙмәттәшлек һәм социалистик үҙ-ара ярҙам мөнәсәбәттәре булып характерлана, тип билдәләне.

Иптәш Сталин, Совет государствоһы үҙенең үҫешендә ике төп фазаны үтте тип күрһәтте:

«Беренсе фаза — ул Октябрь революцияһынан алып эксплоататор синыфтарҙы бөтөргәнгә тиклем булған осор. Был осорҙоң төп бурысы ҡолатылған синыфтарҙың ҡаршылыҡ күрһәтеүен баҫыуҙан, илде интервенттарҙың һөжүменән обороналауҙы ойоштороуҙан, промышленносте һәм ауыл хужалығын аяҡҡа баҫтырыуҙан, капиталистик элементтарҙы бөтөрөү өсөн шарттар әҙерләүҙән торҙо.

Икенсе фаза — ул ҡаланың һәм ауылдың капиталистик элементтарен бөтөрөүҙән алып социалистик хужалыҡ системаһының тулы еңеүенә һәм яңы Конституцияның ҡабул ителеүенә тиклем булған осор. Был осорҙоң төп бурысы — бөтә илдә социалистик хужалыҡты ойоштороу һәм капиталистик элементтарҙың аҙаҡҡы ҡалдыҡтарын бөтөрөү, культура революцияһы ойоштороу, илде обороналау өсөн тулыһынса хәҙерге заманға ярашлы армия ойоштороу». (Сталин, «Ленинизм мәсьәләләре», 11-се баҫма, 605—606-сы биттәр).

Беренсе осорҙа Совет государствоһы ике төп функцияны тормошҡа ашырҙы.

Беренсе функция — ҡолатылған эксплоататор синыфтарҙың ҡаршылығын баҫылдырыу. Пролетариат диктатураһы эшселәр контролен тормошҡа ашырыуға ҡаршылыҡ күрһәтеүсе буржуазияның саботажын емерҙе. Иҫке министерстволарҙағы чиновниктарҙың саботажлығы еңелде. Контрреволюцион ҡулаҡтар тар-мар ителде.

Совет государствоһының беренсе осорондағы икенсе төп функцияһы илде тышҡы һөжүмдән обороналау булды.

Совет государствоһының өсөнсө функцияһы — Совет власе органдарының хужалыҡ-ойоштороу һәм культура-тәрбиә эштәре булды.

Банкылар, тимер юлдар, сауҙа флоты һәм бөтә эре промышленность национализировать ителде, төҙөлөш һәм хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу эштәре башланды.

1924 йылда иптәш Сталин, власте ҡулға алыу ул әле бары тик эштең башланғысы ғына, тине. Сөнки, революциянан һуң буржуазия реставрация яһарға маташыуын ҡараны, сөнки ул саҡтарҙа ул көслө ине әле.

Шулай итеп, пролетариат диктатураһы иҫке экономик һәм политик тәртиптәрҙе ҡағылмаған килеш кенә ҡалдырыусы, ябай ғына «кабинет» алмаштырыу булманы.

Был, шулай итеп, бер буржуаз партияның икенсе буржуаз партия менән алмашыныуы ғына булманы.

Хеҙмәтсәндәр пролетариат диктатураһынан башҡа ла власте ҡулға ала алдылар, ләкин власте диктатуранан башҡа һаҡлау мөмкин түгел ине.

Икенсе фазала үҙгәргән шарттарға һәм бурыстарға ярашлы рәүештә Совет государствоһының функциялары ла үҙгәрҙе.

СССР-ҙа эксплоататор синыфтарҙы бөтөрөү һәм социализмдең еңеүе һөҙөмтәһендә ил эсендә хәрби ҡыҫым яһау функцияһы, эксплоататор синыфтарҙы баҫылдырыу функцияһы төшөп ҡалды: хәҙер ил эсендә бөтөрелгән эксплоататор синыфтарҙың ҡалдыҡтарын баҫылдырыу бурысы ҡала ине.

Капиталистик ҡамалыш булыу айҡанлы илебеҙҙе ситтәр һөжүменән ҡоралы яҡлау функцияһы һаҡланып ҡала. Тимәк, Совет Армияһы һәм Хәрби-Диңгеҙ флоты һаҡлана һәм ныҡытыла.

Общественный милекте һаҡлау революцион законлылыҡтың төп бурысы булып тора. «Колхоздарҙың общественный ерҙәрен туҙҙырыуҙан һаҡлау саралары тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитете һәм СССР Совнаркомының 1939 йыл 27 май ҡарары, «Колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү саралары тураһында» ВКП(б) Үҙәк Комитете һәм СССР Министрҙар Советы ҡарары быға асыҡ миҫал булып тора.

Совет государствоһының икенсе фазаһында хужалыҡ-ойоштороу һәм культура-тәрбиә эштәре функцияһы тулыһынса үҫтерелде.

Иптәш Сталин государство тураһында марксистик-ленинсе учениене социализм осорона ярашлы итеп артабан үҫтерҙе. Ул социализм осоронда Совет государствоһының бурыстары, формалары һәм функциялары тураһындағы мәсьәләне, социалистик общество граждандарының хоҡуҡтары һәм бурыстары тураһындағы мәсьәләне ентекләп эшләне. Ул әҙмә-әҙлекле демократизм принциптәрен һәр яҡлап үҫтерҙе, уларҙы тормошҡа ашырҙы һәм Сталинсе Конституцияла көүҙәләндерҙе.

ВКП(б)-ның XVIII съезында иптәш Сталин, беҙҙең хәҙер бығаса тарихта күрелмәгән һәм үҙенең формаһы һәм функциялары менән беренсе фазалағы социалистик государствонан байтаҡ айырылып торған бөтөнләй яңы, социалистик государствобыҙ бар, тине.

Капиталистик ҡамалыш шарттарында булған социализмдә һәм коммунизмдә государство тураһындағы мәсьәләне иптәш Сталин яңыса ҡуйҙы һәм яңыса хәл итте.

Государство тураһындағы мәсьәләлә марксизмде-ленинизмде боҙоуҙарға ҡаршы беҙҙең коммунистар партияһы һәр ваҡыт көрәшеп килде.

Билдәле булғанса, Бухарин Совет государствоһының бөтәсәге тураһында хатта махсус формула уйлап сығарғайны; был формула буйынса «иң элек армия менән флот бөтәсәк», «унан һуң — карательный һәм репрессия органдары системаһы», «унан ары — мәжбүри хеҙмәт бөтәсәк».

«Киреһенсә булмаҫмикән: иң «унан арыһы», унан һуң «унан һуңғыһы» һәм аҙаҡ килеп «иң элеге» булмаҫмикән?» — тип яҙҙы Ленин был формула—схеманы тар-мар итте (Ленин, Әҫәрҙәр йыйынтығы, XI том, 400-сө бит).

Аҙаҡтан, ул «схемаларҙың» авторҙары провокаторҙар, ситт ил разведкаһының шпиондары булып сыҡтылар.

Социалистик государство тураһындағы марксистик-ленинсе теорияны, атап алғанда, уның бөтөүе тураһындағы мөһим мәсьәләлә иптәш Сталин былай тине: «Анти-Дюрингта» Энгельстең «Государство «юҡҡа сығарылмай», ул үҙенән-үҙе бөтә» тигән формулаһы дөрөҫ, ләкин ике шарттың береһе булғанда: а) әгәр социалистик государствоны өйрәнеүҙе илдең тик эске үҫеше нөктәһенән ҡарап ҡына алып барһаҡ, тикшереүҙе уңайлығы өсөн, был өйрәнеүҙе алдан уҡ халыҡ-ара факторҙан ситкә китеп, илде һәм государствоны халыҡ-ара обстановканан изолировать итеп алып барһаҡ, йәки б) әгәр социализм инде бөтә илдәрҙә йәки күпселек илдәрҙә еңгән тип, капиталистик ҡамау урынына инде социалистик ҡамау бар тип, тыштан һөжүм итеү ҡурҡынысы инде юҡ, армияны һәм государствоны көсәйтеүҙең кәрәге инде юҡ тип уйлаһаҡ».

Билдәле, монополистик капитализмға тиклемге шарттарҙа Энгельс был мәсьәләне тикшергәндә капиталистик ҡамалыш көүек факторҙан ситтә торған.

Иптәш Сталин партияның XVIII съезында коммунизм осоронда ла государство һаҡланып ҡалырмы? — тигән һорауға түбәндәгесә тулы яуап бирҙе: «Эйе, әгәр капиталистик ҡамау бөтөрөлмәһә, һаҡланып ҡалыр. Шуның менән бергә, эске һәм тышҡы обстановканың үҙгәреүенә ҡарап беҙҙең государствобыҙ формаларының янынан үҙгәрәсәге аңлашыла.

Юҡ, әгәр капиталистик ҡамау бөтөрөлһә, әгәр ул социалистик ҡамау менән алмаштырылһа, беҙҙең государствобыҙ һаҡланмаясаҡ һәм үлеп бөтәсәк». (Сталин, «Ленинизм мәсьәләләре» 711-се бит).

Иптәш Сталиндең был теоретик положениелары бөтәһе лә партияға һәм хеҙмәтсәндәргә Совет социалистик государствоһын һәр яҡлап артабан ныҡытыуға, Совет Армияһының боевой ҡеүәтен һәм Совет государствоһының башҡа органдарын һәр яҡлап күтәреүгә ориентация бирҙе.

Совет халҡының Бөйөк Ватан һуғышы тәжрибәһе государствобыҙҙы ныҡытыу буйынса беҙҙең партиябыҙҙың политикаһы иң тиклем алыҫтан күрә белеүсе һәм тәрән аҡыллы булыуын асыҡ күрһәтте.

Ватан һуғышы йылдарында Совет государствоһы алдына бик ҙур яңы бурыстар килеп баҫты; Государство Оборона Комитеты төҙөлдө, государствола бөтә власть тулылығы уның ҡулына тупланды. Гитлер Германияһына һәм империалистик Японияға ҡаршы Ватан һуғышының еңеүле рәүештә тамамланыуы социалистик государствоға яңы триумф килтерҙе.

Советтар Союзы фашизмде тар-мар итеүҙә төп һәм хәл иткес роль уйнаны. Совет государствоһы социализм ҡаҙаныштарын яҡлап алып ҡалды, бөтә донъя цивилизацияһын фашистик илбаҫарҙарҙан ҡотҡарҙы һәм бөтә прогрессив кешелек донъяһына баһалап бөтөргөһеҙ хеҙмәт күрһәтте.

Һуғыш һөҙөмтәһендә империализм көстәре бик ныҡ ҡаҡшаны, а социализмдең көсө, киреһенсә, байтаҡ дәрәжәлә үҫте. Европаларҙың күп кенә илдәрҙең: Польшаның, Чехословакияның, Венгрияның, Югославияның, Болгарияның, Румынияның, Албанияның империалистик системанан төшөп ҡалыуы быны шаһите булып тора. Был илдәрҙең халыҡ массалары государствола власте үҙ ҡулдарына алдылар һәм социализмға күсеү юлына индeләр.

Уларҙың алға алыр, өйрәнер урындары бар. СССР-ҙа социализмдең еңеүе Үҙәк һәм Көнъяҡ Көнсығыш Европа илдәрендәге халыҡтарҙы социализм өсөн көрәшкә рухландыра.

Бөтә донъя хеҙмәтсәндәре Совет государствоһы йөҙөндә халыҡтарҙың азатлығы һәм бойондороҡһоҙлоғо өсөн, милли һәм раса яғынан булған иҙелеүҙәргә, колонияларҙы эксплоатациялауға ҡаршы көрәшеүсене күрә.

Империализмға ҡаршы, демократик лагерҙең башында тороусы Совет государствоһы — бөтә донъяның демократик көстәренең халыҡтарҙың милли бойондороҡһоҙлоғо һәм суверенитеты өсөн, ныҡлы тыныслыҡ һәм ысын демократия өсөн уларҙың көрәшендә ҡаҡшамаҫ, ныҡлы терәк булып тора.

*) Ҡыҫҡартылған лекция.

Партия тормошо

Етәксе кадрҙарҙы политик яктан тәрбиәләү—көндөң мөһим бурысы

Бөтә хужалыҡ-политик бурыстарҙың уңышлы үтәлеүе, беренсе сиратта, етәксе кадрҙарҙың идея-политик һәм культура кимәленә, уларҙың эш квалификацияһына һәм ойоштороусылыҡ һәләтенә бәйләнгән. Шуға күрә лә кадрҙарҙы тәрбиәләү эше айырыуса мөһим бурыс булып тора.

Яҡшы әҙерлек менән һәм регуляр рәүештә үткәрелгән семинарҙар партия, совет һәм хужалыҡ работниктәрен тәрбиәләүҙең бер формаһы ул. ВКП(б)-ның Учалы райкомы ай һайын тәүге партия ойошмалары секретарҙәренең, партколлектив етәкселәренең, колхоз һәм ауыл Советтәре председателдәренең ике-өс көнлөк семинарҙарын үткәреүҙе практикаға индерҙе. Семинарҙа ҡатнашыусылар партия, совет төҙөлөшө, совет экономикаһының нигеҙҙәре һәм халыҡ-ара хәл тураһында лекция тыңлайҙар. Февраль, март айҙарында үткәрелгән семинарҙарҙа «Коммунистар партияһы манифесының йөҙ йыллығы», «Көньяҡ-Көнсығыш һәм Үҙәк Европа илдәрендә демократик үҙгәртеп ҡороуҙар», «АҠШ — донъя реакцияһының үҙәге», «Большевистик етәкселек стиле», «СССР-ҙың государство һәм общество ҡоролошо», «Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план һәм уның үтәлеше» тигән темаларҙа һәм В. И. Лениндең, И. В. Сталиндең биографиялары буйынса лекциялар уҡылды.

Үткән ҡыш урындарҙағы партия, совет ойошмаларының һәм колхоздарҙың етәкселәре итеп бик күп яңы кадрҙар һайланды. Етәкселек эшенә энергиялы, Ленин—Сталин партияһының эшенә бирелгән, осраған ауырлыҡтарҙы еңеп сығырға һәләтле, йәш иптәштәр килде. Ләкин уларҙың етерлек эш тәжрибәләре юҡ әле. Шуның өсөн, семинарҙарҙа етәкселектең практик мәсьәләләрен тикшереүгә һәм тәжрибәләр менән уртаҡлашыуға айырыуса ныҡлы иғтибар бирелә.

Семинарҙарҙың береһендә Миндәк рудникгенең партия ойошмаһы секретаре иптәш Юлаев сығыш яһаны. Ул коммунистарҙы идея-политик яктан тәрбиәләү буйынса үҙенең эш тәжрибәһе менән уртаҡлашты. Рудник партия ойошмаһы 90 коммунисте берләштерә. Уларҙың бөтәһе лә политик уҡыуҙың төрлө формалары менән солтап алынған. ВКП(б) тарихын өйрәнеү түңәрәге һәм 2 политик мәктәп эшләй. Партия ойошмаһы политик белемен күтәреү өҫтөндә үҙ алдарына эшләүсе коммунистарға тейешле ярҙам күрһәтә. «Кыҙыл партизан», «Новый путь» колхоздары эргәһендәге тәүге партия ойошмалары секретарҙәре Хәбиров һәм Боронин иптәштәрҙең сығышы ла ҙур ҡыҙыҡһыныу менән тыңланды.

Яҡшы эшләүсе был партия ойошмаларының эшендә лә етешһеҙлектәр күп әле. Шуның өсөн, тәжрибә менән уртаҡлашыусы иптәштәрҙең сығыштарына дөрөҫ анализ яһарға һәм дөйөмләштерергә кәрәк. Тәүге партия ойошмаларының эштәрен йомғаҡлау һәм дөйөмләштереү буйынса райком секретарҙәре сығыш яһайҙар.

Беҙҙеңсә, бындай семинарҙар күп нәмәгә өйрәтәләр. Докладтарҙың һәм сығыштарҙың алдан ныҡлап уйлап һәм ентекләп әҙерләнеүен тәьмин итергә кәрәк.

Бынан башҡа, ВКП(б) тарихен тәрән өйрәнеү буйынса ВКП(б) райкомы эргәһендә даими эшләүсе семинар бар. Был семинарға ВКП(б) райкомының, район Советы башҡарма комитетының һәм райондағы башҡа учреждениеләрҙең етәксе работниктәре йәлеп ителде. Семинар регуляр рәүештә айға ике тапҡыр үткәрелә. Семинар занятиеләре марксизм-ленинизм классиктәренең әҫәрҙәре буйынса үҙ-ара фекер алышыу һәм дискуссиялар үткәреү методы менән алып барыла.

Күп кенә етәксе работниктәр ВКП(б) тарихын өйрәнеп бөткәндең һуңында үҙ белемдәрен тәрәнәйтеү буйынса эшләмәй башлағайнылар. Шуҡлыҡтан, беҙ даими рәүештә эшләүсе семинар ойоштороуҙы кәрәкле, тип таптыҡ. Был семинар етәксе работниктәрҙе үҙ алдына эшләүгә өйрәтте һәм уларҙың теоретик яктан үҫеүҙәрен күҙәтеп тороуға мөмкинлек бирҙе.

Ләкин коммунистарҙы һәм райондағы бөтә етәксе кадрҙарҙы идея-политик яктан тәрбиәләү эше семинарҙар менән генә сикләнелмәй. Быны иҫәпкә алып, беҙ 15 политик мәктәп, ВКП(б) тарихын өйрәнеү буйынса — 10 һәм иптәш Сталиндең биографияһын өйрәнеү буйынса 17 түңәрәк ойоштороҙоҡ. Киске район партия мәктәбе лә бик яҡшы эшләп килә.

Кадрҙарҙы идея-политик тәрбиәләү эшендә беҙҙең етешһеҙлектәребеҙ ҙә күп әле. Ҡайһы бер урындарҙа занятиеләр формаль рәүештә генә үткәреләләр, уҡыуҙарҙың сифаты түбән. Ҡайһы бер коммунистар, «эш күплеккә» һылтанып, политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә йомшаҡ эшләйҙәр. Бындай иптәштәр масса араһында политик докладтар менән сығыш яһауҙан да тартыналар.

Кадрҙарҙы политик яктан тәрбиәләү эшендәге был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн ныҡышмалы көрәш алып барабыҙ.

Ш. Вәлишин,
ВКП(б) Учалы райкомының пропаганда һәм агитация бүлеге мөдире.

Партия активенең уҡыуы

ВКП(б)-ның Мәләүез райкомының парткабинете ҡаршында Ленин—Сталин әҫәрҙәрен үҙ алдарына өйрәнеүсе етәксе работниктәр—партия, совет һәм хужалыҡ работниктәре өсөн даими хәрәкәт итеүсе семинар эшләй.

Әле күптән түгел, В. И. Лениндең «Империализм капитализмдең юғары стадияһы» тигән китабы буйынса семинар үткәрелде. Сығыш һөйләүсе иптәштәр—Киселёв, Краснов, Подгорко, Карнаков, Ковалев һәм башҡалар үҙҙәренең был теманы ентекләп өйрәнгәнлектәрен күрһәттеләр.

Быйыл В. И. Лениндең «Ни эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Демократик революцияла социал-демократияның ике тактикаһы» тигән әҫәрҙәре һәм И. В. Сталиндең — «Марксизм һәм милли мәсьәлә» тигән әҫәре буйынса ошондай семинарҙар уҙғарылды. Семинарҙарҙа 25—30 кеше ҡатнашты.

Семинарҙарҙы регуляр рәүештә үткәреү унда ҡатнашыусыларҙың активлығын күтәрә һәм уларҙың үҙ алдарына алған белемдәрен ныҡытырға, уны тулыландырырға мөмкинлек бирә. Оҙаҡламайынса И. В. Сталиндең «Октябрь революцияһы һәм рус коммунистарының тактикаһы» тигән темаға семинар үткәреләсәк. Унда ҡатнашасаҡ иптәштәр был теманы байтаҡтан бирле өйрәнәләр.

Ләкин, районда етәксе эштәрҙә эшләүсе иптәштәрҙең үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреү буйынса эшләгән ошо уңышлы яҡтары менән бергә, күп кенә коммунистар, бигерәк тә хужалыҡ ойошмалары етәкселәре, үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә бик аҙ эшләйҙәр. Мәҫәлән, өсөнсө номерле автобаза, райлеспромкомбинат, Советтарҙың VIII съезы исемендәге артель, «Кыҙыл яр», «Пробуждение», Чапаев исемендәге колхоздарҙың етәкселәре үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен күтәреү өҫтөндә эшләү тураһында бөтөнләй онотҡандар. Улар политик белемдәрен күтәреү өҫтөндә үҙ алдарына эшләүселәр булып һаналһалар ҙа, гәмәлдә бөтөнләй уҡымайҙар. Даими рәүештә эшләүсе семинарҙа ла бик һирәк ҡатнашалар.

А. Әхмәтьянов.

Хеҙмәтсәндәр өсөн лекциялар

Ишембай ҡала Советы эргәһендә врачтар, уҡытыусылар, агрономдар, юристарҙан торған 47 кешелек штаттан тыш лекторҙар труппаһы эшләй. Лекторҙар 1 ғинуарҙан алып 28 майға тиклем 146 лекция уҡып, 16243 кеше хеҙмәтләндерҙеләр. «Кешенең барлыҡҡа килеүе», «Коммунистар партияһы манифесының 100 йыллығы», «Совет патриотизмы тәрбиәләү», «Маркс—Ленин уҡымыһы», «Беҙҙең илдең байлыҡтары», «Юғары урожай өсөн көрәш» һәм башҡа темаларға лекциялар үткәрелделәр.

Лекциялардан башҡа клубтарҙа, библиотекаларҙа һәм ҡыҙыл мөйөштәрҙә төрлө темаларға докладтар, беседалар, уҡыуҙар уҙғарыла.

Х. Дәүләтшин,
Ишембай ҡала Советы эргәһендәге культура-ағартыу эштәре бүлеге мөдире.

Беҙҙең республикала

„Главрезинасбыттың" Башкортостан конторааһы ойошторолдо

СССР Союзы Министрҙәр Советы ҡарары буйынса Өфөлә СССР резина промышленносы Министерствоһы «Главрезинасбыттың» Башкортостан конторааһы ойошторолдо. Контораның управляющийы иптәш Сәләйманов беҙҙең хәбәрсебеҙ менән булған бәседәлә түбәндәгеләрҙе һөйләне:

— Беҙҙең контора алдына республиканы Советтар Союзының резина промышленносы предприятиелары эшләп сығарған продукция: автомашина, мотоцикл, велосипед покрышкалары һәм камералары, промышленносты предприятиелары өсөн техник резина, хужалыҡ тауарҙары, резинанан эшләнгән аяҡ кейемдәре, балалар уйынсыҡтары, санитария һәм гигиена әйберҙәре менән тәьмин итеү бурысы ҡуйылған. Икенсе кварталдың ике айында 2 миллион 502 мең һумлыҡ тауар һатылды. Ошо көндәрҙә тағы ла 720 мең һумлыҡ резина аяҡ кейемдәре алынып, сауҙа ойошмаларына тапшырыласаҡ.

Республикаға әҙер продукция бирер менән бергә, беҙҙең контора Башкортостан резина промышленносы предприятиеларына өҫ хужалыҡтарында ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыуҙа ярҙам итә. Был көндәрҙә генә 20 мең пар резина ката, 15-әр мең кейенкә эшләнгән сумка һәм башҡа тауарҙар алынды. Автомашина покрышкаларына һәм камераларына вулканизация яңы ойошторолдо.

Һәүәскәр мотоциклистәр

Черниковск машиналар төҙөү заводы эшселәре, инженерҙәре, техниктәре һәм хеҙмәткәрҙәре мотоспорт менән бик ҡыҙыҡһыналар. Тәжрибә цехы эргәһендә ойошторолған мотоциклды өйрәнеү түңәрәге үҙенең эшен күптән тамамлағайны. Хәҙерге көндә заводта был түңәрәк эшләй һәм унда мотоспортты өйрәнеүселәр 130 кеше өйрәнә.

Түңәрәккә йөрөүселәрҙән ҡайһы берәүҙәре үҙҙәренә мотоцикл һатып алдылар.

Электр станцияһы төҙөлә

Дәүләкәндә электр станцияһы төҙөлә башланы. Был станцияны төҙөү өсөн 2 миллион һумға яҡын аҡса бүленгән. Станция Дәүләкән ҡалаһына һәм уның тирә-яғында урынлашҡан колхоздарға энергия бирәсәк.

Электр станцияһы төҙөү өсөн 1100 кубометр таш, 400 кубометр төҙөү ағасы әҙерләнгән. 500 ат көсөлө дизель алынған. Бында хәҙер йөҙгә яҡын кеше эшләй.

Өфөнөң тарихи урындарында

5 һәм 6 июнь көндәрендә ВКП(б) Өлкә Комитеты эргәһендәге партия мәктәбенең тарих кафедраһы Өфөнөң тарихи урындарына экскурсиялар уҙғарҙы. Экскурсияға мәктәп тарих кафедраһы мөдире К. А. Мельников һәм М. Ғафури исемендәге тел-әҙәбиәт тикшеренеү институтының ғилми сотрудниге П. Ф. Ищериков иптәштәр етәкселек иттеләр.

Экскурсанттар Суворов, Пугачев, Салауат һәм Чапаев булған урындарҙа булдылар.

Һүрәттә: Телефон аппараттары заводының 4-се номерле цех бригадире иптәш А. П. Кривошеина (һулда), контакт һәм реле деталдәрен йыйнау участкаһында эшләүсе Р. М. Лазарева (уңда) етештергән продукцияның сифатын тикшерә. Иптәш Лазарева цехтың иң алдынғы кешеһе. Ул көндәлек заданиене даими рәүештә бер ярым—ике тапҡырға еткереп үтәй һәм юғары сифатлы продукция бирә.

В. Жданов фотоһы.

Ишембай—Ермолаевка тимер юлы—халыҡ төҙөлөшө

Иртәгә, 10 июндә трассаға массовый рәүештә эшкә сығыу көнө

„Яңауыл" колхозы членарҙәре трассаға сыҡтылар

Беҙҙең районға Ишембай — Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөнөң иң яуаплы участкаһы—тәүге беренсе 17 километр бирелгән. Шуға күрә беҙҙән заданиене башҡа райондарға ҡарағанда элек үтәү талап ителә.

«Яңауыл» колхозына бирелгән участка һәр бер колхозсының намыҫлы эшләүен талап итә. Ике километрға һуҙылып киткән трассаның бөтә оҙонлоғона 2—2,5 метр бейеклегендә насыпь һалырға кәрәк. Бөтәһе 4480 кубометр ер эштәре башҡарыласаҡ. Колхозсылар үҙҙәренә ошондай яуаплы эш тапшырылыуы менән ғорурланалар.

Төҙөлөш эше срогы 40 көнгә билдәләнгән булһа, беҙ уны 10 көндә тамамларға иҫәп тотабыҙ. Колхозсылар йыйылышта ошондай ҡарар ҡабул иттеләр. Был ҡарарҙы үтәү өсөн беҙ задание буйынса 40 кеше урынына, бөтә колхозсыларҙы ла эшкә сығарып, эшсе көсөн ике йөҙгә тиклем еткерәсәкбеҙ. Өс эш аты урынына алты ат бүленде. Был тиклем күп һанлы эш көсө менән дөрөҫ етәкселек итеү маҡсатында беҙ заданиеләрҙе бригадаларға, улар йортҡан торған төркөмдәргә бүлеп бирҙек һәм заданиене эшкә беркетелгән һәр бер семьяға еткерҙек. Һәр бер колхозсы ҡайҙа һәм ниндәй эш башҡарырға тейешлеген яҡшы белә. Бөтә нәмә лә үҙ ваҡытында әҙерләнде. Көрәктәр етерлек. 20 дана носилка, балсыҡ ташыу өсөн 6 грабарь бар. Төркөмдәр менән етәкселек итеү өсөн ауыл Советының депутаттары, колхоз правлениеһенең члендәре, активтар, коммунистар беркетелде.

Төҙөлөш эшендәге колхозсылар араһында массовый-аңлатыу эшен коммунистар, комсомолецтар алып барасаҡтар. Улар иң яуаплы участкаларға беркетелделәр. Күрһәткес таҡталары, «боевой листоктар» булдырылды. Бүленгән 10 агитатор колхозсылар менән беседалар уҙғарасаҡ, ҡысҡырып газеталар уҡыуҙы ойоштораҫаҡ. Колхоз эргәһендәге художестволы үҙэшмәкәр түңәрәк концерттәр бирәсәк.

Беҙ Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөндә 10 июнде көтөп тормайынса кисә, 8 июнда ойошҡан рәүештә эшкә башланыҡ. Колхозсылар үҙ өҫтөнә йөкмәтелгән был бурысты уңышлы башҡарып сығыуҙарына ныҡ ышаналар.

Х. Усманов,
Стәрлетамаҡ районы, «Яңауыл» колхозы председателе.

Участкалар ҡабул итеп алынды

Ишембай — Ермолаевка тимер юлын төҙөү республикабыҙҙа биш йыллыҡтың әһәмиәтле төҙөлөштәренән береһе булып тора. Ул беҙҙең Көйөргәҙе районының экономикаһын бик ныҡ үҙгәртәсәк. Хеҙмәтсәндәр юл төҙөү эшенең башланыуын күтәренке рух менән ҡаршылайҙар.

Район Советы исполкомы председателенең урынбаҫары иптәш Прошухаков һәм башҡа ойошмаларҙың вәкилдәре составында төҙөлгән район комиссияһы районға билдәләнгән участканы ҡабул итеп алды. Һәр бер колхозға башҡарыласаҡ эш участкаһы һәм күләм заданиеһе билдәле. Бөтәһе трассаға ике мең колхозсы, йөҙҙә егерме ат сығарыу күҙҙә тотолһайны. Заданиене срогында үтәүҙе тәьмин итеү маҡсатында өҫтәмә рәүештә тағы ла 60 баш тартыу көсө, һәм ер ҡаҙыу эштәрен еңеләйтеү өсөн гусеницалы бер трактор бүленде.

Трассаға сығыуға әҙерлек эштәре тамамланды. Яуаплы кешеләр бөтәһе лә билдәле эш участкаларына беркетелделәр. Районда ошо уңай менән колхоз, ауыл Советтәре председателдәре һәм тәүге партия ойошмалары секретарҙәре менән махсус кәңәшмә уҙғарылды.

Бөгөн райондың колхозсылары бүленгән тартыу көстәре менән участкаларға юлға сығалар. Уларҙы урында район комиссияһы ҡаршы аласаҡ һәм участкаларға урынлаштырасаҡ. Иртәгә, 10 июндә эшсе һәм тартыу көстәре практик эшкә башлайҙар.

Юл төҙөү эшенә оператив етәкселекте тәьмин итеү өсөн район комиссияһы менән район үҙәге араһында телефон бәйләнеше булдырылды. Комиссияға бер автомашина бүленде.

Ғ. Хәмидуллин,
Район Советы исполкомы председателе.

Эшсе көстәре әҙер

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Ғафури район Советы исполкомы председателе иптәш Яковлев беҙҙең хәбәрсебеҙ менән булған беседаһында түбәндәгеләрҙе белдерҙе:

—Колхозсылар трассаға иртәгә, 10 июндә массовый рәүештә сығасаҡтар. Быға ҡарата районды ойошмалары тарафынан байтаҡ ҡына ойоштороу саралары күрелде. Эшкә ылыҡтырылған колхоздарға заданиеләр еткерелгән. Эшсе һәм тартыу көстәре бүленгән. Бригадаларға, төркөмдәргә яуаплы кешеләр беркетелгән. Тауғамалдә трассала биш йөҙ йәйәүле кеше, ун биш ат эшләйәсәк. Хәҙер бөтәһе лә әҙер. Эш участкаларына колхозсыларҙы Аҡҡул станцияһынан ойошҡан рәүештә оҙатыу өсөн һәр бер ауыл Советы үҙенең яуаплы кешеләрен билдәләне. Уларса алдынғы агитаторҙар, коммунистар һәм комсомолецтар трассала эшләүсе колхозсылар араһында культура-массовый эштәрен алып барасаҡтар.

Бөтә эшселәрҙе лә алдынғылар кимәленә күтәрергә

Сталинсе яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн ленинградлылар тарафынан яһалған патриотик саҡырыу бөтә совет кешеләрен яңы еңеүҙәргә рухландырҙы. Предприятиеларҙа социалистик ярыш киңәйә бара. Артта ҡалыусыларға ярҙам итеү, алдынғыларҙы ҡыуып етеү һәм производствола дөйөм күтәрелешкә өлгәшеү — был гүзәл хәрәкәттең үҙенсәлеге булып тора.

Социалистик ярыш байрағы аҫтында эшләп республикабыҙҙың күп кенә промышленность тармаҡтары һәм предприятиелары производствола ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Нефть промышленносы коллективтары йылдан-йыл производство кимәлен үҫтерә баралар. Үҙгән йылда нефть сығарыу, уны элекке йылға сағыштырғанда, 1,5 тапҡыр самаһы күберәк булды. Былар сталинсе биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүгә бөтә массаны мобилизовать итеүҙең, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙың һәм оператив етәкселек итеүҙең һөҙөмтәләре булып тора.

Черниковск машиналар төҙөү заводында ла производствоны яҡшы һәм оҫта ойоштороу өлгөләре аҙ түгел. Завод етәкселәре производство новаторҙары заҡэйщик Матросов, технолог Иванов һәм мастер Российский иптәштәрҙең методтарын цехтарҙа киң рәүештә ҡулланалар. Производство технологияһын яҡшыртыу, яңы техниканы индереү, механизациялаштырыу буйынса эшлекле саралар күрелә. Заводта бынан 2—3 йыл элек айырым стахановсылар, айырым рекордтар ғына булһа, хәҙер стахановсы группалар, стахановсы бригадалар һәм стахановсы цехтар барлыҡҡа килде. Иптәш Большаков етәкселек иткән механик цех бына ошондайҙарҙың береһе. Бында эшселәрҙең ижади хеҙмәтенә юл киң асыҡ. Бер йыл эсендә 170 рационализация тәҡдиме тормошҡа ашырылды. Производство кәңәшмәләре систематик рәүештә үткәрелә һәм улар алдынғы тәжрибәләр менән уртаҡлашыуҙа, артта ҡалыусыларға ярҙам ойоштороуҙа мөһим трибунаға әйләнгән. Был алдынғы цех коллективе инде заводтың башҡа группалары өҫтөнән шефлыҡ итә.

Өфөләге металл штамплау заводында эшселәрҙең уҡыуы яҡшы ойошторолған һәм был хеҙмәт етештереүсәнлегенең артабан күтәреүҙә мөһим сығанаҡ булып тора. Бына ошондай миҫал: үҙған йыл заводҡа инеп эшләй башлаған йәш эшсе Виктор Иванов тәүҙә нормаларҙы үтәй алманы. Завод дирекцияһы был йәш эшсене техминимум курсына уҡыуға ылыҡтырҙы. Иптәш Иванов курсты уңышлы тамамланы һәм хәҙер һәр сменала нормаларҙы 1,5—2 тапҡырға арттырып үтәп килә. Ә бындай өлгөләр заводта күп.

Шул уҡ ваҡытта үҙҙәренең производство эштәрен сталинсе яңы биш йыллыҡ талаптарына яуап бирерлек итеп ойоштора алмаған предприятиелар ҙа юҡ түгел. Бына үҙенең производство планын систематик рәүештә өҙөп килгән Баймаҡ баҡыр иретеү комбинаты. Бында планды үтәүселәргә ҡарағанда, үтәмәүселәр күберәк. Комбинаттың етәкселәре — директоры иптәш Ушаков, партия ойошмаһы секретаре иптәш Кувшинов—бөтә эште үҙ ағышына тапшырып ҡуйғандар. Эшселәрҙең индивидуаль тәртиптә һәм стахановсылар мәктәбендә уҡыуҙары ойошторолмаған. Социалистик ярыш формаль рәүештә генә бара.

Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводы етәкселәре лә алдынғы тәжрибәләрҙе бөтә эшселәрҙең достояниеһе итеү өсөн көрәшмәйҙәр. Мастер комсомолец иптәш Н. Жаринов хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороп, үҙ участкаһында бөтә эшселәрҙең нормаларҙы арттырып үтәүенә өлгәште. Ләкин был, завод етәкселәре тарафынан тейешенсә ярҙам алманы, һәм гүзәл башланғыс башҡа цехтарға күсерелмәне. Заводта шулай уҡ, бөтә Советтар Союзына танылған новаторҙар — Матросов, Российский, Якушин һәм Иванов иптәштәрҙең алдынғы эш методтарын ҡулланыу буйынса ла бер нәмә лә эшләнмәй. Производствоны ойоштороуға, алдынғы тәжрибәләрҙе ҡулланыуға был тиклем әһәмиәт бирмәй ҡарауҙың һөҙөмтәһе лә ҡыҙғаныс. Ҙур әһәмиәтле станоктар төҙөү заводы айҙан-айға планды үтәмәй килә.

Сталинсе грандиоз эш программаларын үтәүҙә айырым эшселәрҙең генә түгел, бөтә урында һәр бер кескәй группаның да, бөтә эшселәрҙең дә нормаларҙы тулыһынса үтәп барыуҙары ҙур әһәмиәткә эйә. Бөтә коллективтең стахановса эшләүенә, һәр бер эшсенең нормаларҙы үтәүенә һәм арттырып үтәүенә өлгәшеү, юғары рекордтарҙы бөтә эшселәрҙең достояниеһе итеү, бөтә эшселәрҙе лә алдынғылар кимәленә күтәреү — үҙәк бурыс булып тора. Бының өсөн предприятиеларҙа производство процестарын камиллаштереү буйынса эшлекле саралар күрергә, техник ойоштороу сараларын эҙмә-эҙ тормошҡа ашырырға кәрәк. Предприятиеларҙа производство кәңәшмәләрен систематик рәүештә үткәреү, эшселәрҙең уҡыуын киң ойоштороу, алдынғыларҙы планды үтәй алмаусыларға ярҙам итеү өсөн беркетеү практикаһы бөтә урында киң рәүештә ҡулланылырға тейеш.

Предприятиеларҙың хужалыҡ етәкселәре, ундағы партия, профсоюз ойошмалары үҙҙәренең практик эштәрен бына ошо йүнәлештә ҡорорға, сталинсе яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүгә, бөйөк Сталинға бирелгән вәғәҙәне үтәүгә киң эшселәр массаһын тулыһынса мобилизовать итергә бурыслылар.

Б. Сафин.

Англия-Америка разведчиктәренең яңы провокацияһы

БЕРЛИН, 28 май. (ТАСС-тың махсус хәбәрсеһенән). Бремен ҡалаһында (Германия) ошо йылдың 23 апрелендә Советтәр Союзының Германиялағы хәрби администрацияһы репарациялар Управлениеһы транспорт группаһының етәксеһе гвардия подполковнигы Я. Д. Тасоев серле шарттарҙа юғалды.

Билдәле булғанса, Бремен ҡалаһы американдар контроле аҫтында тора. Шул уңай менән Совет командованиеһе подполковник Тасоевты эҙләп табыуҙы талап итеп Америка командованиеһенә мөрәжәғәт итте һәм Тасоевтың тормошо һәм иминлеге өсөн яуаплылыкты Америка властарына йөкмәтте. Бер үк ваҡытта Совет командованиеһе Тасоевтың юғалыу шарттарын тикшереү өсөн махсус комиссия бүлде. Ләкин Американдар совет властәре совет комиссияһына был эште тикшереү өсөн Бременға барыу мөмкинлеген биреүҙән баш тартылар һәм бының сәбәптәрен дә аңлатып бирмәнеләр.

Германиялағы Америка властәре подполковник Тасоевтың ҡайҙалыты хаҡында уң көң буйы бер төрлө лә мәғлүмәттәр бирмәй торҙолар.

Америка властәре тарафынан ҡаршылыҡ күрһәтелеүенә ҡарамаҫтан, совет властәренә ошо йылдың 23 апрелендә кис менән Тасоев Американың официаль вәкиле—Бремен порты начальниге Клемдең саҡырыуы буйынса Магбург аллеяһы, 22-се номерле йорт адресе буйынса уның квартираһына киске ашҡа—ҡунаҡҡа киткәнлеген һәм өйөнә кире ҡайтмағанлығын билдәләү мөмкин булды. Тасоев менән бергә йәшәүсе—Советтәр Союзының Германиялағы хәрби администрацияһы репарациялар Управлениеһенең Бремен портындағы вәкиле вазифаһын башҡарыусы лейтенант Беляков Тасоевтың ҡайҙалығын белеү өсөн икенсе көн иртәнсәк сәғәт 7-лә Клемдең квартираһына телефон шылтыратҡан. Уға, Клем китте, Тасоев Клемдең квартираһында юҡ, тип яуап биргәндәр. Беляков шулай ҙа шул уҡ көндә Клем менән осрашыуға өлгәшкән һәм унан Тасоевтың ҡайҙа икәнлеген әйтеүен талап иткән. Клем, уның һәм уның ҡатынының саҡырыуы буйынса Тасоевтың уларға киске ашҡа ҡунаҡҡа килгәнлеген һәм унан һуң шул уҡ көндә уның тарафынан ҡунаҡҡа саҡырылған ниндәйҙер билдәһеҙ ике кеше тарафынан алып кителеүен белдергән. Клемдең был аңлатмаларының мәғәнәһеҙлеге күҙгә сағылып уҡ тора. Шуның өҫтәүенә Клем үҙенең аңлатмаларында буталып бөткән һәм иптәш Беляковтың уның квартираһынан Тасоевтың нисек алып кителеүен белдереүҙе ныҡлап талап итеүенә яуап итеп, Тасоевтың юғалыуы тураһында икенсе төрлө мәғлүмәт биргән. Клем: Тасоевты һәм башҡа кешеләрҙе үҙенә ҡунаҡҡа саҡырып, үҙе ҡатыны менән театрға киткәнлеген, ә театрҙан ҡайтҡас, Тасоевтың ҡунаҡтар тарафынан алып кителгәнлеген белгәнлеген әйткән. Дөрөҫлөккә оҡшамаған был аңлатмаларҙың барыһы, билдәле, Беляковты ҡәнәғәтләндерә алмай. Ул ныҡышмалы рәүештә талап иткәндән һуң Американың Бремендәге хәрби командованиеһенә вәкиле 1-се ранг капитан Джевс ҡабул ителеүгә өлгәште. Джевс янына саҡырылған Клем Тасоевтың юғалыуы тураһында үҙенең мәғәнәһеҙ һүҙҙәрен яңынан ҡабатланы. Шуның менән бергә Беляковтың Тасоевты алып киткән «ҡунаҡтарҙың» исемен әйтеүҙе талап итеүенә Клем яуап бирмәгән. Америка хәрби властәре Тасоев хаҡында 7 майға тиклем бер төрлө яуап бирмәнеләр.

Американың Германиялағы хәрби губернаторының урынбаҫары, генерал-майор Хейс 7 майҙа Советтәр Союзының Германиялағы хәрби командованиеһенә яҙған хатында, совет подполковниге Тасоевтың Америка офицеры, Бремен порты начальниге Клемдең квартираһынан юғалыу шарттарын аңлатыу урынына май башында Англия матбуғатында Англияның сит ил эштәре министерствоһының баҫылып сыҡҡан белдереүенә һылтанды. Был белдереүҙә: «подполковник Тасоев үҙ ирке менән Англияға килде, бында ул политик ҡасҡындарға һыйыныу урыны биреүҙә йәшәп килгән традицияларға ярашлы рәүештә ҡабул ителде» тип әйтелгән.

Күп тә үтмәй Совет хәрби командованиеһенә Великобритания сит ил эштәре министерствоһы «үҙ ирке менән Англияға килде» тип белдергән подполковник Тасоевтың Лондонда төрмәлә ябылып ятыуы тураһында билдәле булды. Совет властәре тарафынан ошо фактының—Англияның сит ил эштәре министерствоһының подполковник Тасоев үҙ ирке менән Англияға килде һәм политик ҡасаҡ булыуы ағыман уға Англияла «һыйыныу урыны» бирелде тигән белдереүен кире ҡағыусы ошо фактының билдәләнеүе айҡанлы һәм Советтәр Союзының Германиялағы хәрби командованиеһенең ныҡлап талап итеүе һөҙөмтәһендә Тасоев инглиздәр тарафынан Лондондан Берлинға килтерелгән һәм 20 майҙа совет властәренә тапшырылды.

Хәҙер асыҡ билдәле булғанса, Англия һәм Америка разведкаһы етәкселегендә Англия-Америка властәре подполковник Тасоевты быға саҡлы ишетелмәгән рәүештә яфалағандар. Асыҡланғанынса, 1948 йыл 23 апрелендә Бремен портының начальниге американлы Клем Тасоевты квартираһына, йәнәһе, киске ашҡа ысынлап та саҡырған. Тасоев лейтенант Беляковты саҡырыуҙы уйламаған өсөн (ғәҙәттә ул уның менән бергә була торған булған) Беляков «ашығыс» эш менән, йәнәһе, Советтәр Союзының «Сучан» тигән пароходына йөк тейәү айҡаилы портҡа саҡырылған. Клем менән бергә Тасоевты ҡатыны алған. Был ҡатын рус телендә һөйләшә белә икән, ул элек Балтик буйындағы Совет республикаларында йәшәгән һәм серле рәүештә Германияға килгән 1946 йылда Клемгә кейәүгә сыҡҡан. Ул Тасоевты столовойға алып ингән, бында бер нисә кеше булған. Клемдең ҡатыны был кешеләрҙе үҙенең дуҫтары тип таныштырған. Күп тә үтмәй Тасоевҡа таныш булмаған 5 кеше менән бергә Клем ҡайтып ингән. Ҡыҫҡа ғына киске ашаудан һуң ҡунаҡтарға автомашиналарҙа Бременда прогулкаға сығырға тәкдим ителгән, ләкин машинаға ултырып барыһы ла ҡуҙғалғас, Тасоев менән йәнәшә ултырыусы ике кеше ҡапыл уның ҡулын бороп, шулай итеп, көслөк юлы менән Англия зонаһына алып килгәндәр һәм таң атҡанса уны шунда тотҡандар. Таң алдында шул уҡ кешеләр Тасоевты самолетка ултырҡандар һәм Лондонға килтергәндәр. Самолетта һөйләшкән һүҙҙәрҙән Тасоев үҙенең Англия разведкаһы ҡулында икәнлеген аңлаған. Уны Советтәр Союзына ҡарағанда бында яҡшыраҡ булыр тип ҡыҙыҡтырырға тырышҡандар һәм Монтгомери самолетында осҡанлыҡтарын һәм Тасоевтың үҙенә күрһәтелгән «шул тиклем юғары бәхетте» баһаламасҡа ышанғанлыҡтарын әйткәндәр.

Лондонда Тасоевты Бишоп Кингс Род, 16—23 адресе буйынса квартираға саҡырғандар. Был квартира, һуңынан билдәле булғанынса, Англия разведкаһының урыны булған.

Үҙен миссис Вигинг тип таныштырған йорт хужаһы ҡатынынан һәм уның ҡыҙы—Англия разведкаһы сотрудницаһы Беттиҙән башҡа Тасоевҡа уның янынан төнө-көнө китмәүсе ике кеше таныштырылған. Тасоев янына рус телендә һөйләшә белгән инглиз разведчиктәре бер туҡтауһыҙ килеп торғандар. Улар ҙа уны Англияла ҡалырға һәм Совет власенә ҡаршы көрәшергә димләгәндәр. Уның квартираһына Советтәр Союзына ҡаршы яҙылған бик күп әҙәбиәт — АҠШ-та сыға торған меньшевистик «Социалистик вестниктан» алып Лондонда сыға торған аҡ гвардиясы газеталарға тиклем килтереп торғандар. Англия разведчиктәре Тасоевты, совет властәре һине хыянатсы тип иғлан иттеләр һәм Великобританияның сит ил эштәре министерствоһы һине үҙ ирке менән Англияға килде һәм политик ҡасаҡ булып тора тип иғлан итте тип ышандырырға тырышҡандар. Улар Тасоевҡа килеп тыуған хәлдән ҡотолоу юлы—политик мотивтар арҡаһында Советтәр Союзынан ҡасҡанлығы һәм Англия хөкүмәтенән үҙенә һыйыныу урыны биреү тураһында һорап ғариза биреү икәнлеген иҫбат итергә тырышҡандар.

Англия властәре вәкилдәре бөтә кешегә билдәле булған ғауғалы эштән йырылып сығыу өсөн һәм уны яфалаусыларҙы аҡлау өсөн «ҡурҡытыу, шантаж һәм көслөк юлы менән Тасоевтан шундай эҙ булһа документ алырға маташҡандар. Тасоев шундай эҙ булһа ғариза яҙыуҙан ҡәтғи рәүештә баш тартҡан һәм үҙен Советтәр Союзының Лондондағы посольствоһына тапшырыуҙы талап иткән.

Үҙе ҡараусыһыҙ инглиздәр алдап Тасоевты 6 майҙа урамға алып сыҡҡан һәм «Олимпия» күргәҙмәһе территорияһына барып инеп бик күп халыҡ алдында: мин—Бременда инглиздәр һәм америкалылар тарафынан урланған совет подполковниге, тип ҡысҡырған, үҙенә Лондондағы совет посольствоһы менән бәйләнеш ҡуйыуҙа ярҙам итеүҙәрен һорағаҡ. Петлицаларында Ф—55 трафареттәре булған полицейский ихтирам менән уға хеҙмәт күрһәтергә тәкдим иткән, ләкин уны совет посольствоһына түгел, ә полицейский дивизионының Брун Грин род урамындағы 19-сы номерле йорттағы төрмәһенә алып барған.

6 майҙан алып 20 майға тиклем полиция төрмәһендә булған ваҡытында Тасоев Англияның сит ил эштәре министерствоһына һәм полиция командованиеһенә үҙен совет посольствоһы вәкиле менән күрештереүҙе, йәки уның хаҡында Советтәр Союзының Лондондағы посолына белдереүҙе һорап көн һайын телдән һәм яҙма рәүештә талап менән мөрәжәғәт итеп торған. Тасоевтың законлы ошо талаптарын ҡәнәғәтләндереү урынына Англия разведчиктәре Тасоевты СССР-ға ҡайтмаҫҡа, ә үҙҙәре яҙған ғаризаға ҡул ҡуйырға димләгәндәр. Тасоев быға риза булмағас уны күп тапҡырҙар туҡмағандар. Шуның менән бергә был хәл һаман киңерәк рәүештә билдәле була барған. Ғауға яҡынлаша башлағас, бынан ҡотолоу өсөн һәм үҙҙәре башлаған провокацияның емерелгәнлегенә ышанып, Англия властәре Тасоевты Германияға кире ҡайтарырға һәм уны бында Совет властәренә тапшырырға мәжбүр булдылар. Совет офицеры өҫтөнән булған был иң киткес мыҫҡыл итеүҙән, уны яфалауҙың Англия-Америка разведкаһы агенттәре өсөн язаһыҙ ҡалыуы мөмкин түгел, уларҙың енәйәтсел эштәре өсөн Англияның һәм Американың Германиялағы хәрби властәре яуаплылар.

Румыния хөкүмәтенең коммюникеһе

БУХАРЕСТ, 4 июнь. (ТАСС). Румыния Халыҡ республикаһының Министрҙар Советы президиумы бөгөн матбуғатта иғлан итеү өсөн түбәндәге коммюникеһе тапшырҙы:

«Бөгөн, 4 июнда, 11 сәғәттә Министрҙар Советенең премьер-министр доктор Петру Гроза председателлегендә ултырышы булды. Министрҙар Советенең вице председателе һәм Румыния эшселәр партияһының генеральный секретаре Георгий Георгиу-Деж, Румыния эшселәр партияһының Үҙәк Комитете исеменән сығыш яһап, хәрби репарациялар өлкәһендә Румыния Халыҡ республикаһының СССР-ға ҡарата булған йөкләмәләрен ҡыҫҡартыу мөмкинлеген ҡарарға үтенеп ССР Союзы Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итергә тигән тәкдим индерҙе.

Румыния эшселәр партияһы генеральный секретаренең тәкдимен тикшереп, Министрҙар Советы СССР Министрҙар Советы Председателе Генералиссимус Сталинға түбәндәге хат менән мөрәжәғәт итергә ҡарар итте:

«СССР Министрҙар Советы Председателе, Генералиссимус Сталин әфәнде!

Румыния Халыҡ республикаһы хөкүмәте СССР Хөкүмәтенә Румыния государствоһының хәрби репарациялар иҫәбенә ҡалған түләүҙәрен ҡыҫҡартыу мөмкинлеген ҡарарға үтенеп мөрәжәғәт итә. Ауырлыҡты кәметеүсе был рәүешсә ҡыҫҡартыу Румыния Халыҡ республикаһының экономикаһын нығытыу һәм үҫтереү эшенә һалған тырышлыҡтарында беҙҙең халҡыбыҙға ҙур ярҙам булыр ине. Һеҙҙең һәм һеҙ етәкселек иткән Хөкүмәттең Румыния халҡына, уның ауыр һынауҙар үткәргән осоронда яғымлы дуҫлыҡ һәм ярҙам тойғолары тураһында белеп, беҙ Румыния Халыҡ республикаһы хөкүмәтенең үтенесе ҡабул ителәсәгенә ышанабыҙ. СССР Министрҙар Совет Председателе әфәнде, Һеҙҙән беҙҙең юғары хөрмәтебеҙҙе ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Министрҙар Советы председателе доктор Петру Гроза».

Чехословакия хөкүмәте президент Бенештең отставкаһын ҡабул итте

ПРАГА, 7 июнь. (ТАСС). Чехословакия хөкүмәте бөгөн ашығыс үткәрелгән ултырышында президент Бенештең отставкаға сығыу тураһындағы ғаризаһын ҡараны. Был туралағы белдереүҙе премьер-министр Готвальд яһаны. Хөкүмәт ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙа Бенештең отставкаһын үкенес менән ҡабул итте, уға эше өсөн рәхмәт белдерә һәм уға ғүмере буйынса президентлек хеҙмәт хаҡын һәм Ланахтағы президент дворецен бирә.

Яңы президент һайлауҙар милли собраниеның ошо йыл 14 июндәге ултырышында буласаҡ.

Репарацион түләүҙәрҙе кәметеү тураһында Венгрия хөкүмәтенең Советтәр Союзы Хөкүмәтенә мөрәжәғәте

БУДАПЕШТ, 5 июнь. (ТАСС). Министрҙар Советенең кисә булған ултырышында премьер-министр Диньеш Лайош хат иғлан итте. Был хат менән, Венгрия коммунистәр партияһы Үҙәк Комитетенең тапшырыуы буйынса, уға был партияның генеральный секретаре — премьер-министрҙең урынбаҫары Ракоши Матиас мөрәжәғәт иткән. Бөгөн башҡаланың газеталарында баҫып сығарылған был хатта түбәндәгеләр әйтелә:

«Венгрия коммунистәр партияһының Үҙәк Комитеты беҙҙең республикабыҙҙың хөкүмәте репарацион түләүҙәрҙе кәметеү тураһындағы һорау менән Советтәр Союзы Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итһен, тип тәкдим итә.

Республика хөкүмәте был үтенесте шуның менән аңлата ала: репарацион йөкләмәләрҙе үтәүҙе беҙҙең хөкүмәтебеҙ һәр ваҡыт намыҫлы эш тип иҫәпләне һәм, илдең экономик хәле ауыр булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы бик аныҡ рәүештә үтәне, Совет-Венгрия договорҙарын да шулай уҡ ысын күңелдән һәм дуҫтарса үтәп килде. Унан һуң шуны ла билдәләргә мөмкин, репарацион түләүҙәрҙе кәметеү өс йыллыҡ план программаларын үтәүгә ғәҙәттән тыш яҡшы тәьҫир итер ине. Өс йыллыҡ пландың маҡсаты демократик Венгрияны политик һәм экономик яҡтан нығытыуҙан һәм хеҙмәтсәндәрҙең тормош кимәлен күтәреүҙән тора. Венгрия коммунистәр партияһының Үҙәк Комитеты беҙҙең ҡыйынлыҡтарыбыҙға элек тә ҙур иғтибар менән ҡараған һәм беҙгә күп тапҡырҙар ярҙам ҡулы һуҙған Советтәр Союзы Хөкүмәтенең һәм Генералиссимус Сталиндең хәҙер ҙә беҙҙең был үтенесебеҙгә ихтирам менән ҡараясаҡтарына ышана».

Министрҙар Советы Ракоши Матиастың тәкдимен бер күңелдән ҡабул итте.

Сит ил эштәре министры Мольнар Эрик бөгөн көндөң тәүге яртыһында СССР-ҙың Венгриялағы посолы Г. М. Пушкинда булды һәм, үҙ хөкүмәте исеменән, уға Министрҙар Советенең ошо туралағы ҡарарын тапшырҙы. Посол Пушкин министрға был ҡарарҙы СССР Хөкүмәте иғтибарына еткерергә вәғәҙә итте.

АҠШ-та Уоллестең өсөнсө партияһын эҙәрләүҙәр

НЬЮ-ЙОРК, 6 июнь. (ТАСС). Матбуғаттың хәбәр итеүенә ҡарағанда, Огайо штатының государство секретаре Хаммел Уоллестең өсөнсө партияһын Огайо штатында тауыш биреүҙәр өсөн исемлеккә индермәйәсәген белдергән. Хаммел штаттың һайлау закондарының «Америкаға ҡаршы эш менән» шөғөлләнеүсе партияларҙы тауыш биреүҙәр өсөн исемлектәргә индереүҙе тыйғанлығына һылтанған. Хаммел үҙенең ҡарарын ниндәй «мәғлүмәттәргә» нигеҙләгәнлеген әйтмәне, ләкин ул әгәр эш судҡа барһа был мәғлүмәттәр биреләсәк, тине.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Бөрө ҡалаһындағы уҡытыусылар институты

1948—1949 уҡыу йылына
СТУДЕНТТӘР ҠАБУЛ ИТӘ

Институт урта мәктәптәрҙең V—VII кластары өсөн уҡытыусылар әҙерләй.

Институттың физика-математика, тәбиғәт-география, тарих, рус теле һәм әҙәбиәте, татар теле һәм әҙәбиәте бүлектәре бар.

Уҡыу срогы 2 йыл.

Институтҡа урта белемле, 17—35 йәштәге һәр ике енес граждандары ҡабул ителә. Институтҡа инеүселәр түбәндәге фәндәрҙән экзамендәр бирәләр:

а) физика-математика бүлегенә инеүселәр — рус теленән һәм әҙәбиәттән, математиканан, физиканан һәм химиянан;

б) тәбиғәт-география бүлегенә инеүселәр — рус теленән һәм әҙәбиәттән, физиканан, химиянан;

в) тарих бүлегенә инеүселәр — рус теленән һәм әҙәбиәттән, СССР халыҡтары тарихенән һәм географиянан;

г) рус теле һәм әҙәбиәт бүлегенә инеүселәр — рус теленән һәм әҙәбиәттән, СССР халыҡтары тарихенән, географиянан;

д) татар теле һәм әҙәбиәте бүлегенә инеүселәр — татар теленән, рус теленән һәм әҙәбиәттән, СССР халыҡтары тарихенән һәм географиянан.

Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдәр менән тамамлаусылар экзаменһыҙ ҡабул ителәләр.

Инеү тураһындағы ғаризалар 10 июндән ҡабул ителә башлайҙар. Институтҡа ҡабул итеү 21 июндән 25 августҡа тиклем.

Ҡабул итеү экзамендәре августың 1-енән 20-һенә тиклем үткәрелә. Уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Инеү тураһындағы ғаризалар, инеүсенең ҡайһы бүлектә уҡырға теләгәнлеге күрһәтелеп, ҡабул итеү комиссияһы исеменә ебәреләләр.

Ғаризаға урта мәктәпте тамамлау тураһында аттестат (подлинникта), автобиография, өс фотокарточка беркетелергә тейеш.

Экзаменгә килеүселәр үҙҙәре менән паспорт алып килергә тейештәр. Институт эргәһендә дөйөм торлаҡ һәм столовой бар. Студенттәр стипендия менән дөйөм нигеҙҙә тәьмин ителәләр.

Ғаризаларҙы түбәндәге адресҡа ебәрергә: Башҡорт АССР-ы, Бөрө ҡалаһы, Интернационал урамы, 6-сы номерлы йорт, Уҡытыусылар институты, студенттәр ҡабул итеү комиссияһы.

Дирекция.

Аксеноволағы ауыл хужалығы техникумы

1948—49 уҡыу йылына баҫыусылыҡ һәм зоотехник бүлектәрҙең I курсына уҡыусылар ҡабул итә

Техникум урта квалификациялы специалистәр—агрономдар һәм зоотехниктәр әҙерләй

Ғаризалар 1 июндән 31 июлгә тиклем ҡабул ителә. 14 йәштән алып 30 йәшкә тиклем ике енес кешеләре лә ҡабул ителәләр. Ғаризаға түбәндәге документтәр теркәлергә тейеш:

Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлау тураһында таныҡма (подлинникта);

Тыуыу тураһында таныҡма (подлинникта);

Автобиография;

Өс фотокарточка;

Хәрби хеҙмәткә мөнәсәбәте тураһында белешмә (военнообязанныйҙар өсөн);

Сәләмәтлеге тураһында белешмә;

16 йәшкә еткән кешеләр паспорттарын алып килергә тейештәр. Техникумға инеүсе бөтә кешеләр ете йыллыҡ мәктәп күләмендә түбәндәге фәндәр буйынса ҡабул итеү һынауҙары бирәләр:

СССР Конституцияһы (телдән),

Рус теленән (телдән, яҙма-диктант),

Математиканан (телдән һәм яҙма).

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августан 20 августҡа тиклем. Уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана. Ете йыллыҡ мәктәпте «отличнo» билдәһенә тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр. Уҡыуҙа өлгәшеүселәргә стипендия бирелә. Техникум эргәһендә дөйөм торлаҡ һәм столовой бар.

Техникум адресе: Аксеново станцияһы, Куйбышев тимер юлы, Аксеново ауыл хужалығы техникумы.

Дирекция.

Өфө республикан медицина техникумы

1948-1949 уҡыу йылына фельдшер, фельдшер-акушер, акушер бүлектәренә, санитарный фельдшерҙәр, медицина лаборанттары бүлектәренә

СТУДЕНТТӘР ҠАБУЛ ИТӘ;

Уҡыу срогы 3 йыл.

Ғаризалар 1 июндән ҡабул ителәләр. Ғариза менән бергә белеме тураһында таныҡма, тыуыуы тураһында таныҡма, сәләмәтлеге тураһында справка, өс фотокарточка һәм автобиография тапшырыла.

Бөтә бүлектәрҙә лә һынауҙар 10 августан 25 августҡа тиклем үткәрелә. Бөтә студенттәр ҙә рус теленән һәм әҙәбиәттән, арифметиканан һәм СССР Конституцияһынан һынау бирергә тейештәр.

1947—1948 уҡыу йылында мәктәптәрҙе отличноға тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Һынауҙарҙы уңышлы тапшырыусылар стипендия менән, ә торор урыны булмаған кешеләр дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәләр.

Адрес: Өфө ҡалаһы, Крупская урамы, 29-сы номерлы йорт. Телефон номере 2-63-09.

Дирекция.

Өфө ҡалаһы, Бабушкин урамындағы 11-се йорттоң 1-се квартираһында тороусы гражданин Ямалетдинов Хазыйм Тарзиман улы, Өфөнөң Аральск урамындағы 21-се йорттоң 1-се квартираһында тороусы гражданка Ямалетдинова Хәдисә Хәбирьян ҡыҙы менән айырылышыу тураһында эш ҡуҙғата.

Эш Өфө ҡалаһының Ленин районы, 2-се участка халыҡ судында ҡараласаҡ.

Редакцияның адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—74-44, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

Ш 00166 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

Кыҙыл Башҡортостан

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 115
11
июнь
йома

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө кала Советы органы.

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында. Беренсе кварталда электр энергияһын экономиялау буйынса социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында. (1-се бит).

Беҙҙең республикала. (1-се бит).

Г. А. Деборин. — Гитлер агрессияһы әҙерләнеүҙе яҡлаған фаш итеү. (2-се бит).

Румыниының һәм Венгрияның репарацион түләүҙәрен кәметеү тураһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары. (2-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. М. Хайдаров. — Партияның эске эштәре кәсәйттәле. (2-се бит).

Бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлекте көсәйтергә! (3-сө бит).

Р. Рогова. Шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрен яҡшы тәрбиәләргә. (3-сө бит).

ВРАЧ КӘҢӘШТӘРЕ. Г. Н. Сперанский. — Иҫән балаларҙы белеп тәрбиәләргә. (3-сө бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Бөйөк халк төҙөлөшө

Кисә яңы тимер юл төҙөлөшөндә—Ишембай—Ермолаевка трассаһында массовый эш башланды. Был яңы тимер юлын төҙөүгә республикабыҙҙың унар меңләгән колхозсылары килделәр.

Төҙөләсәк Ишембай—Ермолаевка тимер юлының беҙҙең республикабыҙ өсөн гына түгел, бөтә илебеҙ өсөн дә әһәмиәте бик ҙур. Ул Советтар Союзының промышленность үҙәктәрен яҡшы сифатлы һәм арзан күмер менән тәьмин итеү өсөн Көйөргәҙе һоро күмер запастарын сығарыуға мөмкинлек бирәсәк. Ул Башҡортостандың хак ягында транспорт мәсьәләһен хал итеп, республикабыҙ артабан экономик үсешенә ныҡ ярҙам итәсәк.

Быны ин өсөн Башҡортостан хеҙмәтсәндәре был тимер юлды төҙөү туралындагы хәбәрҙе ҙур күтәренкелек менән ҡаршы алдылар. БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең, Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөү ул бөтә халк эше, тип иғлан итеүҙәре һәр ерҙә яҡлау отклик тапты.

Совет Башҡортостанының экономикаһын һәм культураһын үстереү өсөн коммунистар партияһы, Совет Хөкүмәте әҙәкһеҙ хәстәрлек күрҙеләр. Был йылдарҙа беҙҙең Автономиялы республикабыҙ ҙур индустриаль һәм культура республикаһына әйләнде. Хәҙер беҙҙә социалистик промышленностең иң алдынғы һәм ҡатмарлы тармаҡтарын машина төҙөү, станоктар, электрик аппаратураһы төҙөү, нефть һәм металлургия заводтары барлыҡҡа килделәр. Улар барыһы ла хеҙмәтсәндәрҙән актив ҡатнашлығы һәм тырышлығы менән тыуҙырылдылар. Әле бик үк күптән түгел стройға индән Туймазы—Өфө нефтепроводын төҙөү-ҙә хеҙмәтсән массалар гүзәл патриотик хеҙмәт өлгөләре күрһәттеләр.

Яңы тимер юл төҙөү срогы бик ҡыҫҡа билдәләнде. Ул ошо йылдың 5 декабрендә — Конституция көнөнә төҙөлеп бөтергә һәм беренсе поездар йөрөй башларға тейеш. Был ваҡыт эсендә 94 километр оҙонлогондағы трассала ике миллион кубометр күләмендә ер эштәре башкарылырға ҡарак. Бурыс ҙур һәм яуаплы. Уны уңышлы хал итеү трассала эшләүселәрҙен ойошканлыгына, берҙәмлегенә һәм тырышлығына бәйләнгән.

Хәҙер трассала эш ҡайнай. Юл төҙөүгә ҡатнашыусы колхозҙар, бригадалар өсөн участкалар бүленгән. Ер ҡаҙыу эштәренә беренсе булып Маҡар, Стәрлетамаҡ райондары колхоздары сыҡтылар. Уларҙан 8 июндә үк инде 4 мендән артыҡ кеше эшләй башланы. Маҡар районы колхоздары төҙөүсе көндәрҙен үк юғары хеҙмәт өлгөһө күрһәтәләр. Улар, үҙҙәренең участкаларын срогынан күп алда тамамларға һүҙ биреп, ҙур ярышҡа сыҡтылар. Айырым колхоздар бөтә колхозсылар ҡатнашлығында воскресниктар ойоштоторға булдылар. Бурыс алдынғыларҙың яҡшы тәжрибәләрен бөтә яҡлап таратыуҙан, көндәлек эш нормаларын үтәү һәм арттырыу өсөн массовый ярышты бөтә кешеләре менән йәйел сбәреүҙән тора. Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитете ике күсмә Ҡыҙыл Байраҡ булдырҙылар. Уның береһе һәр көндә алдынғылыҡ алған участкаға, икенсеһе юл төҙөүҙә алдынғылыҡты алган районға тапшырыласаҡ. Күсмә Ҡыҙыл Байраҡты алыу өсөн көрәш һәр бер райондың, колхоздың һәм һәр бер эшсенең изге бурысы.

Юл төҙөлөшөнә бөтә эштең уңышын ойошканлыҡ, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, һәр бер кешенең тырыш хеҙмәте хал итәсәк. Быға ирешеү өсөн эшселәр араһында көндәлек тәрбиә эше алып барырға кәрәк. Партия ойошмалары төҙөүселәр араһында пропаганда, агитацияның эше яҡшы ойоштороға, эшселәр араһында докладтар, лекциялар, беседалар үткәреүгә, уларҙы газета, журналдар менән тәьмин итеүгә, культура ағынан хеҙмәтләндереүгә тап иғтибарҙы булергә тейештәр.

Юл төҙөү эшендә ҡатнашыусы райондарҙың колхоз, ауыл Советы һәм шулай уҡ район етәкселәре трассала эште үҙҙәренең көндәлек контролдәренә алырға тейештәр. Улар эште дөрөҫ ойоштороуҙы, төҙөүселәрҙен эш шарттары менән тәьмин ителәүҙәрен күҙәтергә бурыслылар. Төҙөүселәрҙе медицина ярҙамы, аҙыҡ-түлек продуктылары, дөйөм тукланыу менән тәьмин итеүҙе өлгөлө ойоштороу һауыл һаҡлау, сауҙа ойошмаларының намыҫ эше.

Ишембай — Ермолаевка тимер юлы ул яңы бик йыллыҡ пландың мөһим төҙөлеше. Республикабыҙ хеҙмәтсәндәре был төҙөлөштө уңышлы башкарыу өсөн һәм уны срогынан алда стройға баҫтырыу өсөн үҙҙәренең бөтә көстәрен, тырышлыҡтарын бирерҙәр.

Ярты йыллыҡ планды 5 айҙа

Башҡорт АССР-ы аҙыҡ Министерствоһының Өфө калаһындагы «Горпищепром комбинат» коллективе үҙенең производство программаһын һәр ваҡыт үтәп, ритмле эшләп килә.

Был коллектив 1947 йылдың һуңгы квартал планын ассортимент буйынса үтәп сыҡҡаны өсөн Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын алганы. Ҡыҙыл Байраҡ алыу уңайы менән комбинаттың стахановсылары 1948 йылдың планын Бөйөк Октябрь социалистик революцияның XXXI йыллыгына үтәп сығыу һәм Ҡыҙыл Байраҡты 1948 йылда үҙҙәрендә һаҡлап ҡалдырыу өсөн көрәшергә һүҙ бирҙеләр.

Комбинат эшселәренең, хеҙмәткәрҙәренең һүҙҙәре буйҙа сыҡмалы. Производство планын үтәү өсөн йәйелдерелгән социалистик ярыш һөҙөмтәһендә коллектив айырылған йылдың ярты йыллыҡ планын срогынан 30 көн элек, беренсе июнгә 122 процентка еткереп үтәне.

Цехтар араһындағы социалистик ярышта кондитер цехы (начальнигы Арсланов), начальнигы Бикмөхәмәтова булған цех һәм айырым стахановсылар араһында ярышта Бажанов, Әхмәтйәнова, Гәлиуллина, Ишмаева иптәштәр алдынғылыҡты ҙур уңышҡа иреште. Улар ярты йыллыҡ пландарын май айының икенсе декадаһында уҡ үтәнеләр.

Тағы ла яҡшыраҡ эшләү өсөн

Директоры иптәш Орел булған заводтың коллективе һуңғыһын йылы бик йыллыҡты ҙур ындага тамамлау өсөн көрәштә бөтә цехтарға һәм агрегаттарҙың да ритмле эшләүен әлгәште. Был производство программаһын систематик рәүештә артыҡ мөмкинлеген тыуырҙы. Заводтың темпы үҫтерә барып, май айы планын 8 көн алда тамамлап, ай аҙагына тиклем планға өҫтәп байтаҡ күләмдә продукция эшләп сығарҙы. Ярты йыллыҡ план беренсе июнгә үтәлде.

Коллектив Октябрь алды ярышын йәйелдереүҙә алдынғы предприятиеләрҙен гүзәл башланғыстарына ҡушылды. Заводтың бөтә эске резервтәренән һәм мөмкинлектәренән сығып, йыллыҡ планды 7 ноябрь көнөнә тамамларға һәм йыл аҙагына тиклем планға ҡарағанда 20 процентка күберәк продукция бирергә, тигән яңы, күтәренке йөкләмә алынды. Коллектив продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү юлы менән 3 миллион һум күләмендә билдәләнгән государство дотацияһын алмаҫҡа булды.

Торлаҡ төҙөлөшө, уны ҡышҡа әҙерләү буйынса ла конкрет йөкләмәләр алынды.

Завод коллективе колхоздарҙы һәм МТС-тарҙы электрләштереүҙә шефлыҡ ярҙамы тураһында Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективенең мөрәжәғәтенә яуап итеп, үҙе шефлыҡ иткән Бөзәяз районының ике колхозын электрләштерергә һүҙ бирҙе.

В. Памирский.

Беҙҙең республикала

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛЫ ТӨҘӨЛӨШӨНДӘ

☆ ☆ ☆

Коллектив алдынғы сафта булыр

(Өсөнсө айырым прораб пункты начальнигы иптәш И. Я. РОМАНОВ менән беседа).

— Ишембай — Ермолаевка тимер юл төҙөлөшөнөң өсөнсө айырым прораб пунктыпа, — тине пункт начальнигы иптәш Романов беҙҙең хәбәрсебеҙ менән булған беседаһында, — яуаплы бурыс йөкмәтелде. 17 километрға һуҙылып киткән был участкала коллектив күп кенә насыпь һалырға, күперҙәр төҙөргә, торбалар үткәрергә тейеш. Быныц өсөн беҙгә Стәрлетамаҡ районының 101 колхозы беркетелде. Участкала алты меңгә яҡын колхозсы, 240 ат эшләйәсәк. Эш көстәре менән дөрөҫ етәкселек итеү маҡсатында 4 колонна ойошторолдо. Мәҫәлән, мастер Замарев етәкселегендәге беренсе колонна станция юлдарын үҫтерә барырға, 4-се колонна (мастер иптәш Рыбаҡов) яһалма ҡоролмалар төҙөргә тейеш. 2-се, 3-сө колонналар менән мастер Шамань, Володин иптәштәр етәкселек итәләр. Уларға билдәле һанда колхоздар беркетелде һәм һәр бер колхозға айырым эш участкаһы бүлеп бирелде. Юл төҙөлөшөндә эшләүсе колхозсыларға оператив етәкселекте тәьмин итеү өсөн һәр километр һайын бер мастер бүленгән.

Прораб пункты колхозсыларҙың килеүҙәренә 117 тачка, 100 скрепер әҙерләне. Скрепер менән эшләү бик уңайлы. Уға ике ат егеп, көнөнә 40 кубометр балсыҡ ташырға була. Бында беҙҙең 200 ат эшләйәсәк. Быларҙан тыш колхозсыларҙың ярҙамы менән 100 грабарь эшләнде. Ә инде яһалма ҡоролмаларға килгәндә, уларға кәрәкле деталдәрҙе әҙерләү өсөн беҙҙең үҙебеҙҙә тимер-бетон конструкциялары етештереү заводы бар. Ул хәҙер яҡшы ғына эшләй.

Участкала төҙөү эштәре башланды. Аллағуат ауыл Советенең колхоздары 8 июндә үк трассаға сыҡтылар. «Яңауыл» колхозы 40 кеше урынына 180 кеше, 3 ат урынына 6 ат сығарҙы. Колхозсылар тәүге көндән үк үҙҙәренең эш нормаларын арттырып үтәй баралар.

Башҡа колхоздарҙан да эшсе һәм тартыу көстәре күҙҙә тотолғанға ҡарағанда байтаҡ күберәк килә. Быныц менән колхоздар үҙҙәренә бирелгән заданиеләрҙе срогынан 10 — 15 көн алда үтәргә әҙер торғанлыҡтарын күрһәтәләр. Беҙҙең коллектив төҙөүселәр араһында социалистик ярышты киң ойоштороп, тапшырылған эштәрҙе башҡарыуҙа трассала алдынғылар сафында булыр.

☆

Трассала

Яңы тимер юл төҙөлөшө управлениеһенең мәғлүмәттәренә ҡарағанда, трассаны разведкалау, ерҙе полосаларға бүлеү кеүек әҙерлек эштәре тамамланды. Ул барлығы бер мең ике йөҙ эш точкаһын эсенә ала. Көрәк, лом, кәйлә һәм башҡа шундай ер ҡаҙыу инвентарҙәре әҙерләнде. 30 йөк автомашинаһы ебәрелде һәм ягыулыҡ ташылды. Ер ҡаҙыу өсөн июнь аҙағында трассаға алты экскаватор ебәреләсәк. Ә июль айында төҙөлөштәге экскаваторҙарҙың һанын 12 лаҡаға еткереү күҙҙә тотола.

Төҙөүселәрҙе аҙыҡ-түлек һәм промышленность тауарҙары менән хеҙмәтләндереү өсөн алты урында магазин асылды. Унда сәй, шәкәр, ярма, карамель, башҡа аҙыҡ-түлек, промышленность тауарҙары килтерелде.

☆

Юл төҙөлөшөнә—эшкә

Йомағужа районының колхоздары яңы тимер юл төҙөлөшөнә эшсе һәм тартыу көстәре ебәрҙеләр. Тәүге мәлдә һигеҙ йөҙгә яҡын колхозсы һәм 80 баш самаһы ат сығарылды. Эшсе көстәре етерлек һанда эш ҡоралдары — көрәк, кәйлә, тачкалар, носилкалар, транспорт инвентарҙәре менән тәьмин ителгән.

Төҙөүселәр араһында политик-массовый эш алып барыу өсөн алдынғы агитаторҙар билдәләнде. Урында күсмә библиотекалар, ҡыҙыл мөйөштәр эшләйәсәк.

Ф. Ғималетдинов.

Заводҡа ягыулыҡ

Белорет металлургия заводын яғыулыҡ менән Инйәр күмер усаҡтары тәьмин итә. Утын күмер яндырыу пункттарына Инйәр йылғаһы буйлап һал менән килтерелә. Һалсылар быйыл, үткән йылдарға ҡарағанда, күп яҡшы эшләнеләр, намыҫлы хеҙмәт күрһәттеләр. Улар ҡыйынлыҡтарҙы еңә барып, һыу юлы менән 80 мең кубометр утын килтерҙеләр. Исламов, Асылғужин, Ибраһимов, Бәхтияров кеүек алдынғы һалсылар аҡсалата бүләк алдылар.

Б. Ғәзизов.

Тиҙләтелгән метод менән

ОКТЯБРЬСК. Бында тиҙләтелгән метод менән яңы, 434-сө номерле буровой бораулана башланы. Буровой ҡеүәтле оборудованиелар менән йыһазландырылған.

Бораулау мастеры иптәш Топчий һәм уның бригада ағзалары алдынғылар өлгөһөндә станок-айға 1000 метр тиҙлегендә үтергә һәм скважинаны срогынан алда бораулап бөтөрөргә йөкләмә алып, ярышҡа сыҡты.

Х. Маннан.

Сәсеүлектәр яҡшы тәрбиәләнә

ТӘТЕШЛЕ. (Телефон аша). Район 7 июнгә 25 мең 608 гектар ашлыҡ сәсеп, яҙғы сәсеү планын тулыһынса үтәне. Быйыл, уҙған йылға сағыштырғанда, ашлыҡ 5 мең гектарға артыҡ сәселде.

«Искра», «Динамо», «Берлек», «Ташкент» — бөтәһе 12 колхоз сәсеү планын арттырып үтәне.

Һуңғы ямғырҙар сәсеүлектәрҙең торошон яҡшыртты. Колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу һәм пар һөрөү эштәре киң йәйелдерелде. «Искра», Азна исемендәге, «Демен», «Ташкент» һәм башҡа колхоздар пар һөрөүҙе хөкүмәт тарафынан билдәләнгән срокта үтәнеләр.

Х. Фазлыева.

Киң ҡулланыу тауарҙары

Баймаҡ районының «Коммунар» промартеле быйыл хеҙмәтсәндәргә йөҙ егерме мең һумлыҡ киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарырға тейеш. Артель ағзалары бирелгән планды намыҫлы рәүештә үтәргә йөкләмә алып, үҙ-ара социалистик ярышты киң ойошторҙолар. Һөҙөмтәлә коллектив биш айлыҡ планды беренсе июнгә 150 процентка үтәне һәм пландан тыш 79 мең һумлыҡ тауар эшләп сығарҙы.

Артелдең юғары хеҙмәт өлгөләре күрһәткән стахановсылары үҫеп сыҡтылар. Н. Кинекужин, Ғ. Хәсәнов, З. Фәйзуллина, В. Ҡурамшин, М. Исламғуловалар көндәлек нормаларын һәр ваҡыт арттырып үтәйҙәр. Коллектив темпты артабан да төшөрмәйәсәк.

Б. Дияров.

Мәктәптәр селтәре киңәйтелә

Республикала мәктәптәрҙең селтәре йылдан-йыл киңәйә бара. Ағымдағы йылда Башҡортостандың райондарында йәшәп килгән мәктәптәрҙе киңәйтеү, уҡыу-уҡытыу эштәренә ҡулайлаштырыу өсөн Башҡорт АССР-ы мәғариф Министерствоһы 12,5 миллион һум аҡса бүлде. Был сараны үткәреү мәктәптәрҙә уҡыу-уҡытыу эштәрен байтаҡ яҡшыртасаҡ.

Бынан башҡа Зианчура, Краснокам, Ауырғазы һәм Яңауыл райондарында дүрт яңы урта һәм ете йыллыҡ мәктәптәрҙе һалыу эше тамамланды. Был мәктәптәрҙә 1948—1949 уҡыу йылында меңдән артыҡ бала уҡыясаҡ.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында

Беренсе кварталда электр энергияһын экономиялау буйынса социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында

Ошо көндәрҙә Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы электр энергияһын экономиялау буйынса Өфө энергосистемаһындағы промышленность предприятиеләренең 1948 йыл беренсе квартала социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡараны.

Электр энергияһын экономиялау буйынса социалистик ярышта беренсе урынды алған агрегат заводы (директоры Советов, баш энергетиге Мартьянов иптәштәр) еңеүсе тип табылды. Завод беренсе квартал производство программаһын 121,3 процентка үтәгән һәм 605 мең киловатт-сәғәт электр энергияһын йәки үҙе ҡуллана торған дөйөм электр энергияһының 33,7 процентен экономиялауға өлгәште. Заводҡа БАССР Министрҙәр Советының күсмә Ҡыҙыл Байрағын һәм 20 мең һум күләмендә аҡсалата премия бирергә ҡарар ителде. Күсмә Ҡыҙыл Байраҡ химия заводынан алып бирелә.

Икенсе урынды Черниковск машиналар төҙөү заводы (директоры Ферин, баш энергетиге Невосруев иптәштәр) алды. Ул беренсе кварталда производство программаһын 102 процентка үтәгән һәм 2181 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһаны. Заводҡа 35 мең һум күләмендә аҡсалата премия бирелде.

Өсөнсө урынды беренсе квартал производство планын 112,2 процентка үтәгән, 32,4 мең киловатт-сәғәт электр энергияһын йәки үҙе ҡуллана торған дөйөм электр энергияһының 6,5 процентен экономиялауға өлгәшкән резина промышленносе заводы (директоры Торопыгин, баш энергетиге Марков иптәштәр) алды. Был заводҡа 5 мең һум күләмендә премия бирергә ҡарар ителде.

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы электр энергияһына экономия яһауҙа шулай уҡ электр оборудованиеләре, тау оборудованиеһе, Черниковскиҙәге лампалар, Благовещенскиҙәге машиналар төҙөлөшө заводтарының, 8-се март исемендәге фабриканың, Өфө трамвайының һәм башҡаларҙың яҡшы эшләгәнлектәрен билдәләп үтте. Был предприятиеләр беренсе кварталда 247,5 мең киловатт-сәғәт электр энергияһына экономия яһанылар.

Белинский тураһында кино фильм

Документаль фильмдарҙың үҙәк кино студияһы 7 июнда илдең экрандарына бөйөк рус тәнҡитсеһе, революцион демократтың үлеүенә 100 йыл тулыуға арналған—«Виссарион Белинский» тигән яңы фильм сығарҙы.

Фильмдә архивта һаҡланған ҙур күләмдәге документтар, — Белинскийҙең осорҙаштары тарафынан уның тормошо тураһында әйтелгән ҡараштары һәм ғалимдың ижадының общественный политик әһәмиәтен күҙәтләндергән башҡа материалдар файҙаланылған.

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Касьянов Владимир Тихонович — эштәр етәксеһе, профессор, С. М. Киров исемендәге «Электросила» заводының консультанты. Лютер Роберт Андреевич, Шапиро Давид Вениаминович, Рабинович Исай Натанович, Ҡашин Алексей Алексеевич — шул уҡ заводтың инженерҙәре. Уларға Сталин премияһы даими тоҡлы эре электромашиналар һәм генераторҙар уйлап сығарған өсөн бирелде.

ТАСС фотохроникаһы.

Гитлер агрессияһы әҙерләнеүҙең яңынан фаш итеү

«Тарихте боҙоп күрһәтеүселәр» тигән тарихи белешмәлә Икенсе бөтә донъя һуғышының ғәйепләләре турыһында тарихи дөрөҫлөктө ҡайтанан торғоҙоу маҡсатында гитлерсе Германияны тар-мар иткән саҡта совет ғәскәрҙәре тарафынан алынған йәшерен документтәр — гитлерсе Германия менән Англия, Франция һәм АҠШ хөкүмәттәре араһындағы мөнәсәбәттәр турыһындағы документтар Совет Хөкүмәте тарафынан иғлан ителәсәктәр, тип әйтелгәйне. Шуға ярашлы рәүештә, Икенсе бөтә донъя һуғышы алдынан булған документтарҙың беренсе томы СССР Сит ил эштәре Министерствоһы тарафынан баҫып сығарылғайны. Күптән түгел был документтарҙың икенсе томы баҫылып сыҡты*).

Был томға 1938—1939 йылдарҙа Гитлер хөкүмәтенең Лондондағы посолы булған герман дипломаты Дирксендең архивенән алынған служебный телеграммалар, хаттар, донесениелар һәм башҡа материалдар инәләр. Бер иҫә документ, шул иҫәптән, Германияның Париждағы посолы Вельчектең ике донесениеһе, ҡушымтала бирелгән.

Иғлан ителгән материалдар, гитлерсе агрессияға Англия һәм Франция хөкүмәттәре тарафынан күрһәтелгән булышлыҡтарҙы яңынан дөрөҫләйҙәр, ул булышлыҡтарҙы АҠШ-тың етәксе ҡрүгтары ла яҡлағандар. Был яҡтан Вельчектең 1936 йыл 26 декабрҙә гитлерсе сит ил эштәре министре Нейратҡа яҙған хаты ҡыҙыҡлы булып тора.

Вельчек, Германияның, һуғышты башлап ебәргәс, коммунистар етәкселек иткән халыҡ массаларының ҡаршылыҡ күрһәтеүенә осрағаҫағын алдан күргән. Ләкин Вельчекте Францияның етәксе ҡрүгтарының позицияһы әмәтләндергән. Премьер-министре ул социалист Блюм булған Франция хөкүмәте милли хыянатсы политикаһы алып барған. Испанияла һуғышты башлап ебәргән гитлерсе Германияны дәртләндергән. Был хөкүмәт герман фашизмына ябай булышлыҡ итеү менән генә ҡалмаған — ул герман фашизмы алдында теҙ сүккән. Быны билдәләп, Вельчек оятһыҙ рәүештә былай тип яҙа: «...француздар һуңғы йылдарҙа битәрләнеп тороуҙарына ҡарамаҫтан, хәҙер ҙә әле һөйләшеүҙәр башларға риҙалар. Ләкин фюрер үҙ-ара аңлашыуға өлгәшеү өсөн ҡул һуҙа, ә француздар беҙгә ҡул һуҙалар; түҡмалыусы үҙенә һуҡҡая кешегә мөрәжәғәт итә».

Гитлерсе Германияға ярамһаҡланып Францияның сит ил эштәре министре Дельбос үҙ-ара ярҙам турыһында Совет-Француз Договорын — Франция именлегенең мөһим нигеҙен билдәләүсе договорҙы юҡҡа сығарырға әҙер булыуын белдергән. Вельчек, Дельбос менән үҙенең һөйләшеүҙәре турыһында Берлинға хәбәр итеп, Франция хөкүмәте бөтәһенән күберәк Германия менән килешергә ынтыла, тип билдәләгән. Башында Леон Блюм торған был хөкүмәт гитлерсе агрессияны дәртләндергән, уны көнсығышҡа, Советтәр Союзына ҡаршы йүнәлтергә самалаған.

Дирксен архивендә ҡыҙыҡлы документ бар. Ул гитлерсе Германияның Англия реакционерҙәре менән бәйләнештәре иң тиклем алыҫҡа киткәнлеген асып бирә. Австрияны баҫып алғандан һуң күп тә үтмәҫтән, Англия реакцияһы, кол ителгән Чехословакия иҫәбенә Германияны ҡоралландырыу, Советтәр Союзына ҡаршы һуғышҡа фашистарҙы дәртләндереү өсөн, Чехословакияны баҫып алыуға Германияны өндәй башлаған. 1938 йылдың май айы баштарында Англияның консерватив газетаһы «Дейли мейл» үҙенең хужаһы Лорд Ротермирҙең «Чехтарҙа беҙҙең эшебеҙ юҡ» тигән мәҡәләһен урынлаштырған. Автор, һүҙ уңайында әйткәндә, Чехословакия «бер төн эсендә үҙенең йәшәүен туҡтатыуы мөмкин» тигән үҙенең элекке мәҡәләһенән өҙөмтә килтергән. Ротермир мәҡәләһенең теҡсы герман посолы Дирксен менән алдан килешелгән булған, ул, Дирксен, тексты тулыһынса хуплаған һәм «был яғымлылыҡ юғары баһаланды» тип белдергән.

Ротермирҙең «Дейли мейлдә» сығыш яһауы осраҡлы булмаған. Был сығыш Англия хөкүмәтенең Гитлер яҡлы политикаһын ҡеүәтләндергән. Дирксен үҙ донесениеларенең береһендә был политикаға түбәндәгесә характеристика бирә: «Англияның хәҙерге хөкүмәте... үҙ программаһының мөһим пункттарының береһе буйынса Германия менән килешеү эҙләне..: Ул Германия тарафынан ҡуйыла торған төп талаптарҙың иң мөһим пункттарын аңлауға яҡын килде...» Германияның Лондондағы эштәрендә поверенныйы, Дирксендең иң яҡын ярҙамсыһы Кордт та шул хаҡта уҡ хәбәр иткән, ул «Британия хөкүмәте беҙҙең теләктәребеҙҙе ҡаршыларға әҙер» тип яҙған.

Англия хөкүмәтенең позицияһын иҫәпкә алып, Гитлер үҙенең адъютанты Видеманды Лондонға ебәргән. Гитлерсе башлыҡтарҙың Лондонға килеү ихтималы турыһындағы мәсьәлә тикшерелгән. Великобританияның ул ваҡыттағы сит ил эштәре министре Галифакс, былай визит турыһындағы фекерҙе ул котлай ғына түгел, «әгәр фюрер король менән Лондон урамдарынан үтһә, был минең ғүмеремдә иң күңелле момент башланды, тигән һүҙ булыр ине» тип яуап биргән. Шулай уҡ эште асыу килтергес демонстрациянан башҡа үткәрергә тура килгән, сөнки ул халыҡ массаларының ҡотолғоһоҙ отпорын тыуҙырыр ине. Йәшерен сделкаларҙың элекке политикаһы дауам иткән. Дирксен, «Англия деятелдәре менән артабан һөйләшеүҙәр һуңғы ике айҙа хәйгиня Гогенлоэ аша алып барылды», тип хәбәр итә.

Англия һәм Франция хөкүмәттәре Чехословакияны өҙгөләү өсөн тотоп бирергә әҙер булалар. Дирксен 1938 йылдың йәйендә отпускаға китә. Китер алдынан Чемберлен менән беседала була, ул герман посолына, Британия хөкүмәте Чехословакияны Германияға биреү турыһындағы «мәсьәләне тыныс юл менән хәл итеүгә килтереү өсөн мөмкин булғандың бөтәһен дә эшләйәсәк», тип ышандырған.

Дирксен тик 1938 йылдың октябрендә генә Лондонға кире килә. Хәҙер уның бурысы, гитлерсе агрессив уйҙарға Англия хөкүмәтенең артабан булышлығын тәьмин итеүҙән тора. Был бурысты хәл итеү герман посолынан артыҡ ҙур оҫталыҡ талап итмәгән, сөнки Англия капиталистәре, Америка монополистәре кеүек үк, Германияның һуғышҡа әҙерләнеүенә актив ярҙам иткәндәр.

Халыҡ-ара реакция герман йыртҡыстарына туранан-тура булыша. Гитлер инде һис бер төрлө һөйләшеүҙәрҙән башҡа ла бөтә Чехословакияны баҫып ала. Дирксен хәбәр иткәнсә, Англия общественносе аптырап ҡала. Чемберлен тынысландырыусы белдереүҙәр менән сығыш яһай. Ә шул уҡ ваҡытта, Англия хөкүмәте гитлерсе Германия менән яңы һөйләшеүҙәр башлай.

1939 йылдың июлендә «айырым порученелар өсөн» гитлерсе чиновник Вольтат Лондонға килә. Англияның тышҡы сауҙа министре Хадсон һәм Чемберленең иң яҡын сотрудниге, уның ярҙамсыһы Вильсон кит аулау промыселдәренең эшен юлға һалыу турыһында һөйләшеүҙәр һылтауы аҫтында Вольтат менән осрашалар.

Ләкин ғәмәлдә Вильсон һәм Хадсондың Вольтат менән беседаһы бөтөнләй башҡа темаларға арналған булған. Британия хөкүмәте гитлерсе Германияға донъяны экономик һәм политик яҡтан бүлеү буйынса киң килешеү төҙөү турыһында йәшерен һөйләшеүҙәр башларға официаль рәүештә тәҡдим иткән. Беседаның яҙмаһында: «Яңы баҙарҙы асыу һәм булғандарын эксплоатациялау маҡсаттарында Англия-Германия хеҙмәттәшлегенең бик алыҫҡа барыусы пландарын Хадсон артабан үҫтерҙе. Ләкин ул, шул уҡ ваҡытта, донъяла Германия менән Англия үҙ көстәрен һалыу өсөн киң мөмкинлектәр алырлыҡ тағы ла өс ҙур өлкә, атап әйткәндә, Англия империяһы, Ҡытай һәм Россия йәшәй, тигән фекер белдерҙе», тип әйтелә. Англия хөкүмәте әгәр ҙә Германия Советтәр Союзы халыҡтарын ҡорал көсө менән ҡол итә алһа, уларҙы герман промышленниктәре, банкирҙәре һәм помещиктәре тарафынан колониаль эксплоатациялауға һис ҡаршы килмәйәсәген уға аңлатҡан.

Англия вәкилдәре Англия һәм Германия араһындағы политик-хәрби һәм экономик союздың конкрет программаһын йәйелдергәндәр. Был программаға һөжүм итешмәү турыһында пакт төҙөү, тығылмаусылыҡ турыһында пакт төҙөү һәм башҡалар ингән. Англия хөкүмәте тығылмаусылыҡ турыһындағы пактта «киңәйтелгән пространстволарҙы бөйөк державалар араһында, айырыуса Англия һәм Германия араһында сикләү», йәғни донъяны ике империалистик йыртҡыс араһында бүлеп алыуҙы күҙҙә тотҡан.

Англияның лейбористик лидерҙәре консерватив хөкүмәттең халыҡҡа ҡаршы йүнәлтелгән империалистик уйҙарын тотошо менән яҡлағандар. Лейбористарҙың башлыҡтары күҙ буяу өсөн генә Чемберлен политикаһын тәнҡитләгәндәр. Ә ғәмәлдә, улар уны тотошо менән хуплағандар һәм гитлерсе Германия менән йәшерен килешеү яһауға әҙер булғандар. Лейбористарҙың күренекле лидеры Бакстон менән һөйләшеү үткәргән герман посольствоһы советнигы Кордттың доклад яҙмаһы быны асыҡ күрһәтә. Родон Бакстон үҙ һүҙен «үҙенә бер төр йәшерен дипломатияға кире ҡайтырға» һәм «общественный фекерҙең һәр төрлө ҡатнашлығынан тыш» Англия менән Германия араһында һөйләшеүҙәр алып барырға кәрәклектән башлай.

Бакстон фашистарҙың «йәшәү пространствоһы» булдырыу турыһындағы теләктәрен хуплаған, «йәшәү пространствоһы» һүҙенән немец империалистәре башҡа илдәрҙең ерҙәрен баҫып алыуҙы һәм миллиондарса кешеләрҙе физик юҡ итеүҙе аңлағандар. Бынан ары Бакстон «Великобритания Германия менән интерестар сфераларын сикләү турыһында килешеү төҙөргә әҙер булыуын белдерәсәк» һәм «Көнсығыш һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европала Германияның интерестары сфераларын тулыһы менән ихтирам итергә» риза буласаҡ, тиҙән. Бакстон Англияның Советтәр Союзы менән һөйләшеүҙәр алып барыуына Германия тынысһыҙланырға тейеш түгел, сөнки Великобритания был һөйләшеүҙәрҙе туҡтатырға әҙер һәм, бынан тыш, «Францияның Советтәр Союзы менән союзын юҡҡа сығарыу һәм Францияны үҙенең Көньяҡ-Көнсығыш Европалағы бөтә бәйләнештәренән баш тарттырыу йүнәлешендә эш итергә Великобритания вәғәҙә бирә», тигән.

Был йәшерен килешеү Англия-Франция-Совет пакты турыһында Мәскәүҙә һөйләшеүҙәр алып барылған саҡта үткәрелгән. АҠШ-тың идара итеүсе ҡрүгтары яҡлаған Англия һәм Франция тарафынан Мәскәүҙә алып барылған һөйләшеүҙәрҙең барыһы тик бер ҡатлы манёвр, ике йөҙлө уйындың һәүбәттәге аҙымы ғына булғанлығын Дирксен архивендәге документтар кире ҡағылмаҫлыҡ рәүештә күрһәтәләр. Ғәмәлдә Англия менән Франция үҙ политикаһының элекке линияһын дауам иттергәндәр. Был, гитлерсе Германияны Советтәр Союзына ҡаршы провокацион котортоу политикаһы булған.

Англияның идара итеүсе ҡрүгтары гитлерсе Германия менән үҙҙәренең йәшерен һөйләшеүҙәренә, Советтәр Союзы менән һөйләшеүҙәргә ҡарағанда, сағыштырғыһыҙ ҙур әһәмиәт биргәндәр. Улар Германия менән ыңғылап та һүҙ ҡуйышыуҙы, уның агрессияһың СССР-ға ҡаршы йүнәлеүҙе һәм Германияның еңеүҙәрендә үҙ өлөштәрен алыуҙы түҙемһеҙлек менән көткәндәр. Ә Советтәр Союзы менән килешеүгә килеүгә Англия менән Франция бөтөнләй ынтылмағандар. Улар СССР менән һөйләшеүҙәрҙе тик общественный фекерҙең иғтибарын томалау өсөн генә алып барғандар. Ысынында был хөкүмәттәр, һуғышыу өсөн Германияға иң уңайлы шарттар вәғәҙә итеп, Гитлерҙе Советтәр Союзына ҡаршы һөжүмгә күндерергә тырышҡандар.

Был герман дипломатияһы өсөн сер булмаған. Дирксен былай тип белдергән: «Хәрби миссия ебәрелеүгә ҡарамаҫтан, — йәки, дөрөҫерәге шул арҡала, — бында Россия менән пакт турыһында һөйләшеүҙәрҙе дауам иттереүгә скептик рәүештә ҡарайҙар. Был турала Англияның хәрби миссияһы составы асыҡ күрһәтә: адмирал — был көнгәсә Портсмуттың коменданты, практик рәүештә отставкала тора һәм бер ваҡытта ла адмиралтейство штабында торғаны юҡ; генерал — шулай уҡ ябай строй офицеры; авиация генералы — күренекле летчик һәм осоу искусствоһы уҡытыусыһы, ләкин стратег түгел. Был, хәрби миссия, оперативный килешеү төҙөшөүгә ҡарағанда, Совет Армияһының һуғышсан һәләтлеген билдәләүҙе үҙенең бурысы итеп тота икәнлеген күрһәтә».

Англия хөкүмәте, гитлерсе агрессияға юлды таҙартып, үҙенең гарантиялар политикаһын киҫкенмәҫтән бөтөрергә әҙер булыуында Германияны ышандырған. 1939 йылдың 3 августында, һуғыш башланырҙан бер ай алда, Чемберлен исемнән һәм уның ҡушыуы буйынса эш итеүсе шул уҡ Гораций Вильсон менән Германияның Лондондағы посолы Дирксен бик оҙаҡ беседа яһаған. Вильсон Гитлерҙе һәм гитлерсе Германияның политикаһын маҡтаған. Ул Вольтат тарафынан башланған һөйләшеүҙәрҙе дауам иттерергә һәм эште тағы ла йәшеренерәк алып барыу өсөн был һөйләшеүҙәрҙе Швейцарияға бүлһә лә күсерергә тәҡдим иткән. Вильсон, Англия-Германия килешеүен төҙөшөү менән Британия хөкүмәте «уның тарафынан Польша, Төркиә һәм башҡаларға ҡарата хәҙерге ваҡытта үҙ өҫтөнә алған гарантия йөкләмәләренән» үҙен азат итеп һанаясаҡ һәм шуның менән «Англия-Германия аңлантаһы төҙөлгәс Англияның гарантия политикаһы фактик рәүештә бөтөрөләсәк» тип, белдергән. Англия хөкүмәте үҙенең союзнигы Польшаны герман агрессияһы алдында яңғыҙ ҡалдырырға әҙерләнгән белдергән.

* * *

Дирксен архивенән алынған документтарҙың иғлан ителеүе АҠШ, Англия һәм Францияла тырышып-тырмашып тарихте боҙоп күрһәтеүселәргә яңы сирьез удар, гитлерсе агрессия һәм Икенсе бөтә донъя һуғышы ениәйтселәрен яңынан фашлау булып тора. Был документтар АҠШ тарафынан яҡланған Англия һәм Франция хөкүмәттәренең һуғыш алды йылдарында ныҡышмалы һәм тайныһыҙ рәүештә Советтәр Союзына ҡаршы, шулай уҡ Көнсығыш һәм Көньяҡ-Көнсығыш Европаның башҡа государстволарына ҡаршы гитлерсе агрессияға юл асыуҙарын бик асыҡ күрһәтәләр. АҠШ, Англия һәм Францияның идара итеүсе ҡрүгтары гитлерсе агрессияны ҡоралландырғандар һәм уның башланыуына булышлыҡ иткәндәр. Улар һуғышты булдырмау турыһында түгел, ә тик гитлерсе Германияның буласаҡ табышын уртаҡлашырға ошотмау турыһында ғына хәстәрлек күргәндәр. Быны нама өсөн Британия хөкүмәте йәшерен һөйләшеүҙәр юлы менән герман агрессияһының юлындағы табышты бүлешеүҙә үҙ өлөшөн алдан билдәләргә тырышҡан.

Англияның идара итеүсе ҡрүгтары донъяның күпселек өлөшөндә йогонто сфераларын Германия менән бүлешеүгә иҫәп тотҡандар. Улар Европа илдәрендә колониаль режимдең урынлаштырылыуына ризалыҡ биргәндәр. Англия хөкүмәте герман фашистарына ҡаршы бер төрлө лә отпор бирергә уйламаған. Англия-Франция-Совет һөйләшеүҙәрен өҙөү Англия һәм Франция тарафынан алдан уҡ планлаштырылған һәм Гитлер агрессияһы бөтөнләй йәйеп ебәрелергә тейеш булған.

Совет Хөкүмәтенең бөйөк Сталин тарафынан етәкселек ителгән аҡыллы тышҡы политикаһы донъя реакцияһының мәкерле уйҙарын селпәрәмә килтерҙе. Алыҫтан күрә белгән совет тышҡы политикаһы Советтәр Союзы өсөн һәм азатлыҡ һөйөүсе халыҡтар өсөн Икенсе бөтә донъя һуғышының уңайлы тамамланыуын бик ныҡ алдан билдәләне.

Профессор Г. А. Деборин.

*) «Икенсе бөтә донъя һуғышы алдынан булған документтәр һәм материалдар», Том II: Дирксен архиве (1938—1939 йылдар). Государство политик әҙәбиәт издательствоһы, 1948 йыл, 287 бит, хаҡы 8 һум.

Себер колхоздарында

КРАСНОЯР. (ТАСС). Себер колхоздарында быйылғы яҙ яңы төҙәлештәр, скверҙәр, стадиондар, быуаларға бай. Крайҙың 10 ауыл хужалығы артелендә ҡусма электростанциялар стройға инделәр. 70 колхоздың «Рекорд» маркаһындағы тирмәне бар.

Мул тормош һәм культура һәр бер ауылда һиҙелә. Канск, Рыбинск һәм Совет районының колхозсылары һәм механизаторҙары колхоздарға велосипедтарҙа һәм мотоциклдарҙа баралар. Май айында колхозсылар сельпо магазиндарынан меңдән артыҡ велосипед һатып алдылар. Рыбинск районының Заозерск сельпоһында өс ай эсендә 2,5 миллион һумлыҡ велосипедтәр, мотоциклдар, пианино, радио приемниктәр, өҫ кейемдәре, туҡымалар, культура тауарҙары һатылған. «Победа» колхозының баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Шаваругин сельпонан мотоцикл, туҡымалар һәм башҡа тауарҙар алды.

«Красный хлебороб» ауыл хужалығы артеленең колхозсыһы Поликарп Сергеевич Сеньковский семьяһы менән эшләп, 200 боттан артыҡ иген, шул уҡ тиклем картуф һәм йәшелсә, шулай уҡ 9.349 һум аҡса алғайны. Уның семьяһы патефон, велосипед, аяҡ кейемдәре, трикотаж һәм туҡымалар һатып алды. Шул уҡ артелдең колхозсылары Назар Сидорович Леоненко, Николай Федорович Соловьев, Алексей Алексеевич Силькевич һәм башҡалар күп әйберҙәр һатып алдылар.

Промышленность тауарҙарына булған талап көндән-көн үҫә — Назаровск, Рыбинск һәм Ужурск районының колхозсылары 100 мотоцикл алыу өсөн райпотребсоюзға заявка ебәрҙеләр. Березовск районы колхозсыларынан «Москвич» һәм «Победа» маркалы автомашиналар алыу өсөн заявкалар килде.

Румынияның репарацион түләүҙәрен кәметеү турыһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары

Совет матбуғатында хәбәр ителгәненсә, Румынияның Министрҙәр советы председателе П. Гроза Румыния эшселәр партияһы Үҙәк Комитетенең тәҡдиме буйынса Румыния хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән ҡарарға ярашлы рәүештә 4 июнда СССР Министрҙәр Советы Председателе иптәш И. В. Сталинға ярашыу договоры нигеҙендә Румыния государствоһының Советтәр Союзына әле ҡалған репарацион түләүҙәрен кәметеү турыһында үтенес менән мөрәжәғәт иткәйне.

Был мөрәжәғәткә яуап итеп иптәш И. В. Сталин 7 июнда Румыния халыҡ республикаһының Министрҙәр советы председателе П. Грозаға түбәндәге йөкмәткеле хатты ебәрҙе:

«Хөрмәтле Председатель әфәнде,

Һеҙҙең 4 июндәге мөрәжәғәтегеҙҙе алдым.

Совет Хөкүмәте Румыния государствоһының хәрби репарациялар иҫәбенә Советтәр Союзына әле ҡалған түләүҙәрен кәметеү турыһында Румыния хөкүмәтенең үтенесен ҡараны. Румыния халыҡ хужалығын тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыуҙы еңеләйтергә теләп һәм беҙҙең илдәребеҙ араһында урынлаштырылған дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен иҫәпкә алып, Совет Хөкүмәте репарацион түләүҙәрҙең ҡалған суммаһын ошо йылдың 1 июленән башлап 50 процентҡа кәметергә тигән ҡарар ҡабул итте.

Тәрән ихтирам менән
СССР Министрҙәр Советы
Председателе И. Сталин».

(ТАСС).

Венгрияның репарацион түләүҙәрен кәметеү турыһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары

Венгрия компартияһы Үҙәк Комитетенең тәҡдиме буйынса Венгрия хөкүмәте 4 июнда, ярашыу договоры нигеҙендә Венгрия тарафынан Советтәр Союзына түләнә торған репарация суммаларын кәметеү турыһында үтенес менән Совет Хөкүмәтенә мөрәжәғәт итергә ҡарар итте, тип Совет матбуғатында хәбәр ителгәйне.

Венгрия хөкүмәтенең 5 июнда СССР-ҙың Венгриялағы посолы иптәш Пушкин аша Совет Хөкүмәтенә бирелгән мөрәжәғәтендә былай тип әйтелгәйне:

«Венгрия хөкүмәте репарацион йөкләмәләрҙе үтәүҙе һәр ваҡыт үҙенең намыҫлы эше тип иҫәпләне һәм, илдең экономик хәле ауыр булыуға ҡарамаҫтан, уларҙы бик аныҡ рәүештә үтәп килде, Совет-Венгрия договорҙарын да шулай уҡ ысын күңелдән һәм дуҫтарса үтәп килде. Репарацион түләүҙәрҙе кәметеү Венгрия демократияһының экономик һәм политик яҡтан нығыуын бик ныҡ тиҙләтер ине һәм өс йыллыҡ планды үтәүҙә тәҙәттән тыш яҡшы булышлыҡ итер ине. Был пландың маҡсаты беҙҙең халыҡтың көн-күреш кимәлен күтәреүҙән тора. Беҙҙең ҡыйынлыҡтарыбыҙға элек тә ҙур иғтибар менән ҡараған һәм беҙгә күп тапҡырҙар ярҙам ҡулы һуҙған Советтәр Союзы Хөкүмәтенә һәм Генералиссимус Сталинға хәҙер ҙә беҙҙең был үтенесебеҙгә ихтирам менән ҡараясаҡтарына Венгрия хөкүмәте ышана».

Был хатҡа яуап итеп СССР-ҙың Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов Венгрияның сит ил эштәре министре Мольнар Эрикҡа түбәндәге йөкмәткеле хат ебәрҙе:

«Хөрмәтле министр әфәнде,

Совет Хөкүмәте ярашыу договоры нигеҙендә Венгрия тарафынан Советтәр Союзына түләнә торған репарацияларҙың суммаларын кәметеү турыһында Венгрия хөкүмәтенең үтенесен ҡараны. Венгер халҡының Венгрия республикаһының экономикаһын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса тырышлыҡтарын еңеләйтергә теләп һәм беҙҙең илдәребеҙ араһында урынлаштырылған дуҫтарса мөнәсәбәттәрҙе иҫәпкә алып, Совет Хөкүмәте репарацион түләүҙәрҙең ҡалған суммаһын ошо йылдың 1 июленән башлап 50 процентҡа кәметергә тигән ҡарар ҡабул итте.

Һеҙгә йәрәктән ихтирам менән
СССР-ҙың Сит ил Эштәре
Министры В. М. Молотов».

(ТАСС).

Партия тормошо

Партияның эске эштәре көсәйтелде

Тирлән заводы партия ойошмаһы отчет-һайлау йыйылышы тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы үтәүҙә байтаҡ ҡына эштәр башҡарҙы. Завод партия ойошмаһы һәм цех партгруппалары хәҙер партияның эске эшенә ныҡ иғтибар итәләр.

Партия йыйылыштары әҙерлекле һәм йөкмәткеле үтә башланы. Күптән түгел булып үткән дөйөм йыйылышта заводтың техник-экономик планы турыһындағы мәсьәлә ҡаралды. Был мәсьәлә партбюро тарафынан ай ярым ваҡыт әҙерләнде. Махсус экономик комиссия заводтың эске мөмкинлектәрен ентекләп өйрәнде һәм алдынғы кешеләр менән кәңәшләште. Ныҡлы әҙерлек менән ҡаралған был мәсьәлә буйынса фекер алышыуҙарҙа рядовой коммунистар ҡиммәтле бик күп тәҡдимдәр индерҙеләр. Цехтағы партия ойошмаларының да дөйөм йыйылыштары шундай уҡ сирьез әҙерлек менән үткәрелә.

Завод партия ойошмаһы коммунистарҙы политик яҡтан тәрбиәләү эшен айырыуса яҡшыртыуға өлгәште. Ойошмала учетта торған коммунистар бөтәһе лә политик уҡыуға йәлеп ителгән. Партия тарихен өйрәнеү буйынса һигеҙ түңәрәк һәм политик мәктәптәр эшләй. Комсомолецтар өсөн дүрт түңәрәк ойошторолған. Политик уҡыу түңәрәктәренә коммунистар һәм комсомолецтар әҙерлектәренә ҡарап беркетелгәндәр. Ҡырҡтан артыҡ коммунист политик белем кимәлен күтәреү өҫтөндә үҙ алдына уҡый. Уларға материалдарҙы үҙләштереүҙә партия ойошмалары тарафынан практик ярҙам күрһәтелә, консультациялар һәм лекциялар үткәрелә.

Заводтағы 50 агитатор цехтарҙа, агрегаттарҙа даими рәүештә агитацион-массовый эш алып бара. Агитаторҙар занятиеларҙе ныҡлы әҙерлек менән, заводтың үҙ тормошондағы фактыларға бәйләп үткәрәләр. Агитатор иптәш Филочкиндең беседалары айырыуса яҡшы эстәлекле, йәнле формала булалар.

Завод партбюроһы агитаторҙар менән даими эш алып бара, систематик рәүештә семинарҙар үткәрә. Был семинарҙарҙа эш тәжрибәләре менән уртаҡлашыуға ла ныҡ иғтибар бирелә. Агитаторҙарҙың политик белем кимәлен күтәреү маҡсатында теоретик темаларға лекциялар уҡыла. Партбюро агитаторҙарҙың эшен көндәлек контроль аҫтында тота, уларға әҙәбиәт әҙерләү, консультациялар биреү юлы менән ярҙам күрһәтә. Агитколлектив етәксеһенең һәм айырым агитаторҙарҙың эше турыһындағы мәсьәлә бюро ултырышында йыш ҡына тикшерелә.

Завод партия ойошмаһының иң яҡшы әҙерлекле коммунистарҙан һайлап алынған, 15 кешенән торған докладсылар группаһы бар. Был иптәштәрҙең күбеһе — заводтың партия, хужалыҡ етәкселәре. Партбюро секретаре иптәш Братов систематик рәүештә политик темаларға докладтар яһай һәм беседалар үткәрә. Завод директоры иптәш Голынский аҙна һайын цехта, эшселәр араһында доклад яһай.

Киң күләмдә алып барылған политик-массовый эш завод коллективен биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн актив көрәшкә күтәрә. Завод беренсе квартал планын арттырып үтәү менән бергә, апрель һәм май айҙарын да ҙур уңыштар менән тамамланы. Быйыл завод коллективы, 1947 йылға ҡарағанда, байтаҡ металл артыҡ эшләп сығарыу өсөн көрәшә. Был бурысты үтәгәндә, быйыл заводтың валовой продукция эшләп сығарыуы 1950 йыл өсөн билдәләнгән план кимәленә тиклем етәсәк.

Партия ойошмаһы ошо бурысты хәл итеү маҡсатында социалистик ярышҡа етәкселекте байтаҡ яҡшыртты. Коммунистар производство планы өсөн көрәштә намыҫлы хеҙмәт менән өлгө күрһәтәләр. Прокат цехындағы коммунистарҙың күбеһе вальцовщик булып эшләй. Цехтарҙа эшләүсе коммунистарҙың 90 проценте стахановсылар, Урцев, Королев, Корнеев һәм Чертыхин кеүек коммунистар хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәштә башлап ебәреүселәр һәм күптәрҙе эшкә әйҙәтеүселәр булып һаналалар.

Ойоштороу һәм политик эште отчет-һайлау йыйылышы күрһәтмәләре нигеҙендә ҡайтанан ҡороп, Тирлән заводының партия ойошмаһы коллективте яңынан-яңы еңеүҙәргә алып бара. Был ойошма һуңғы отчет-һайлау йыйылышында ҡабул ителгән ҡарарҙарҙы большевиктарса үтәү өсөн ныҡлы менән көрәшә.

М. Хәйҙәров.

Бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлекте көсәйтергә!

☆ ☆ ☆ ☆

24 гектар люцерна сабылды

Каганович исемендәге колхозда (Дәүләкән районы) Хеҙмәт Кыҙыл Байраҡ орденле Михаил Кибельников бригадаһы 3 бесән сапҡыс менән люцерна үләнен сабыуҙа башланы. Бесән сабыусылардан Ғирфанов Хәбибулла, Ғәлимов Әмирбай, Идрисов Миндияр ике көндә 24 гектар люцерна үләне саптылар.

☆

Бесән сапҡыстар ремонтланмай

10 — 15 көндән бесән сабыу эштәре башланасаҡ. Ләкин Абзан районының 40 колхозынан 30-ында бесән сапҡыстар һәм тырмалар әҙер түгел. «Көрәш» колхозында бесән сапҡыстың береһе тимерлек эргәһендә ремонтланмайынса ятып ята, ә икенсеһен үҙған йыл район ауыл хужалығы бүлеге алған, уны кире ҡайтарыу тураһында уйлаған кеше лә юҡ. Колхоздың тимерлеге эшләмәй.

Үҙған йыл «Искра» колхозында бесән һәм силос әҙерләү тураһында алдан хәстәрлек күрмәү арҡаһында малдарҙы ҡышлатып сығарыуға аҙыҡ етешмәне. Колхоз етәкселәре быйыл да малдарға етерлек аҙыҡ әҙерләү тураһында кайғыртмайҙар, бесән сабыуға әҙерлек алып бармайҙар.

«Үрнәк» колхозында ла бесән сапҡыс үҙған йылдан бирле ялан да ята. «Юлдаш», «12 Октябрь», «Асыҡ юл» колхоздарында ла бесән сабыуға әҙерлек эштәре алып барылмай.

Ә район ауыл хужалығы бүлеге һәм уның өлкән зоотехнигы иптәш Ҡаналетдинов колхоздарҙа бесән сабыуға әҙерлек эше менән бөтөнләй етәкселек итмәй. Участка зоотехниктәре лә был эштән ситтә торалар. Мәҫәлән, зоотехниктарҙан Бежов һәм Плещаков иптәштәр Мәнбәтша ауыл Советындағы колхоздарға беркетелгәндәр. Был участкала үҙған ҡыш аҙыҡ етешмәгәнлектән һәм тәрбиә насар булғанлыҡтан бик күп мал ауырыны һәм үлде. Быйыл да үҙған йылғы хаталарҙың ҡабатланыу ҡурҡынысы бар. Был ауыл Советындағы бер генә колхозда ла ошо көнгә тиклем бесән сабыуға әҙерлек эше башланмаған. Ә Бежов, Плещаков иптәштәр күберәк үҙҙәренең хужалыҡтарында шөғөлләнәләр.

Абзан районы колхоздары быйыл 200 мең центнер бесән һәм 500 тонна силос әҙерләргә тейештәр. Был эштең уңышлы үтеүе, беренсе нәүбәттә бесән сабыуға яҡшы әҙерлек менән килеүгә бәйләнгән. Район ауыл хужалығы бүлеге работниктәре был мөһим эш менән оператив етәкселек итергә тейештәр.

К. Сафин.



Туймазы МТС-ы ремонтсылары комбайндарҙы ремонтлауҙы тамамлау алдында торалар. Ремонтсыларҙың социалистик ярышында алда барыусы иптәш Төхфәтуллин бригадаһы 6 комбайн ремонтланы.

Һүрәттә (һулдан уңға): комбайндар механигы Ш. Вәлиуллин, комбайнер Ш. Төхфәтуллин иптәштәр яңы ремонтланган комбайндың моторын ҡарайҙар.

Ф. Ғәлиев фотоһы.

Комбайндар колхоздарға оҙатылды

РАЕВКА. (Телефон аша). Ташлы МТС-ы коллективы урожай йыйнауға уңышлы әҙерләнә. Үҙған йыл ошо ваҡытҡа ни бары өс комбайн ремонтланһа, быйыл 27 комбайн ремонтланды. Уларҙың бөтәһе лә государство комиссияһы тарафынан, яҡшы ремонтланган, тип табылды.

Ҡалған өс комбайн ошо көндәрҙә тулыһынса ремонтланып бөтәсәк. Бер үк ваҡытта урожай йыйнау машиналарын — лобогрейкалар, урғыстарҙы ремонтлау эштәре бара. Күпселек комбайндар үҙҙәре эшләйәсәк колхоздарға оҙатылдылар.

М. Солтанов.

☆

Арышты яһалма һеркәләндереү урожайҙы арттыра

Иглин районының Соколов исемендәге колхозы үҙған йыл арыш сәсеүлегенә яһалма һеркәләндереү үткәреү һөҙөмтәһендә 109 гектарҙың һәр береһенән 18-әр центнер арыш урожайы алыуға өлгәште. Ә яһалма һеркәләндереү үткәрелмәгән майҙанда һәр гектарҙан 15-әр центнер урожай алынды. Шулай уҡ Иылайыр районы Буденный исемендәге колхозда ла был сараны ҡулланыу аша арыш урожайы 18 процентҡа күберәк алынды. Өфө тәжрибә баҫыуында яһалма һеркәләндерелгән майҙандың һәр гектары уртаса 2,5-әр центнер өҫтәмә урожай бирҙе.

Арыш — башаҡтағы сәскәләрҙең туҙандары менән һеркәләнеү аша орлоҡлана торған үҫемлек. Быны өсөн бер арыш башағындағы һеркә икенсе башаҡтағы сәскәгә осоп ҡуныуға һәм уны орлоҡландырырға тейеш. Шулай булмағанда, башаҡтың бер өлөш сәскәләре орлоҡланмай ҡала, һөҙөмтәлә арышта тулы емле булмаған башаҡтар күп кенә осрай һәм был уның дөйөм урожайын кәметеүгә сәбәп була.

Арыштың башаҡтары күпселек ваҡиғала ел ярҙамы менән һеркәләнә. Ел артыҡ көслө булһа, йәки бөтөнләй булмаһа, башаҡтарҙың һеркәләнмәй ҡалыуҙары ла мөмкин. Был ваҡиғаларҙа күп өлөш һеркә елгә осоп әрәм була. Был хәлде булдырмаҫ өсөн арышҡа яһалма рәүештә өҫтәмә һеркәләндереү үткәрергә кәрәк.

Был эштең техникаһы бик ябай. Арыш һеркәләнә башлағас та, ике кеше оҙон кәҙәк арҡандың йәки дилбегәнең ике осонан тотоп, башаҡтарҙы һелкетеп үтәләр. Сәскәләнә торған арыш башаҡтары ергә тейеп, һеркәне осоралар һәм улар күршеләге башаҡтарҙың сәскәләрен орлоҡландыралар. Был сара башаҡтарҙың күберәк һәм тулыраҡ һеркәләнеүенә ярҙам итә.

Яһалма рәүештә өҫтәмә һеркәләндереү арыш массовый рәүештә сәскә атҡас үткәрелә. Ул бер үк массивта 3 — 5 көн буйына бер нисә тапҡыр үткәрелергә тейеш. Һеркәләндереү өсөн иң уңайлы ваҡыт—иртәнге ысыҡ кипкәс һәм көндеҙгә эҫелек башланыуҙан элек. Был сәғәттәрҙә башаҡтарҙа һеркәләр эшмәкәрле булалар. Ямғырлы көндәрҙә яһалма һеркәләндереү яуын туҡталып торған араларҙа үткәрелергә тейеш.

Быйыл Башҡортостанда арыш, үҙған йылдарға ҡарағанда, 12—15 көнгә иртә башаҡланды. Быйылғы шарттарҙа уның сәскәләнеүе һәм һеркәләнеүе лә ҡыҫҡа сроклы буласаҡ. Быларҙы иҫкә алып, яһалма һеркәләндереү эшен һис һуңлатырға ярамай.

В. Ғирфанов,
Башҡортостан баҫыусылыҡ тәжрибә станцияһының агротехника бүлеге мөдире.

Бөжөр МТС-ы механизаторҙарының уңыштары

Бөжөр МТС-ында комбайндар ремонтына 13 комбайнер, 12 комбайнер ярҙамсыһы һәм бөтә ремонтсы специалистар ылыҡтырылды. 3 ремонт бригадаһы көндәр буйынса бригадно-узловой метод менән эшләнеләр.

Социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәү маҡсаты менән токарҙар ике сменала эшләүгә күстеләр. Магнето коробкаларын ремонтлаусылар менән поршендәр ремонтлаусылар эшендә тоткарлыҡ булманы. Ә комбайн моторлыҡтарының рамаларын реставрациялау эшендә әҙәкләк килеп тыуҙы. Уны бөтөрөү өсөн тәжрибәле специалистар токарь Иван Елькин менән слесарь Зәки Харисов шул эшкә күстеләр һәм тиҙ ваҡыт эсендә бында ла эш темпы күтәрелде. Һөҙөмтәлә бөтә эш тармаҡтары буйынса ла нормалар арттырылып үтәлә башланы.

Ремонтсылар май алды социалистик ярышында 10 комбайн һәм 11 мотор ремонтланылар. Эш комиссия тарафынан ҡабул ителеп алынды. Ә еңеү байрамы—9 майға тағы ла 2 комбайн һәм бер мотор әҙер булды.

МТС коллективы, шулай итеп, хәҙер яңы урожайҙы йыйнауға әҙерлеге тулыһынса теүәлләнә. Механизаторҙар быйыл урожайҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн әҙер торалар.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

☆

Әҙерлек юҡ

Салауат районы «Байкал» колхозында үҙған йыл етерлек бесән һәм силос әҙерләмәү арҡаһында малдарҙы ҡышлатыу бик ҙур ҡыйынлыҡтар менән үтте. Мал аҫрау март айында уҡ бөткән. Колхоз етәкселәре күрше колхоздарҙан ут-еҫкә бесән йыйнап йөрөргә мәжбүр булдылар.

Үҙған йылғы был әсе һабаҡтарҙан тейешле һығымталар яһалманы. Бесән сабыу ваҡыты етеп килә, ә әҙерлек әле башланмаған да. Колхоздың бер бесән сапҡыс машинаһы һәм ат тырмаһы бар. Улар үҙған йыл бесән сапҡан ерҙә ҡалып, тутығып бөткәндәр. Уларҙы тиҙерәк ремонтлау тураһында уйлаған кеше лә юҡ.

Бер генә сағы ла, ҡул тырмалары ла, һәнәк тә әҙерләнмәгән. Ә колхоз 420 гектар майҙандың бесәнен сабып алырға һәм бик күп силос әҙерләргә тейеш.

Колхоз председателе иптәш Ғәйсин быйыл ферма малдары өсөн күпме бесән һәм силос әҙерләнергә тейешлеген дә белмәй.

К. Фәхретдинов.

Врач кәңәштәре

Йәш балаларҙы белеп тәрбиәләргә

Йәш бала өсөн иң яҡшы аҙыҡ—әсә һөтө. Әсә һөтөндә баланы туҡландырыу һәм уны төрлө йоғошло ауырыуҙарҙан һаҡлау өсөн кәрәк булған бөтә аҙыҡтар бар. Баланың ашҡаҙаны күкрәк һөтөн еңел үҙләштерә. Быны ни өсөн баланы бер йыл тулғансы күкрәк һөтө менән туҡландырырға кәрәк.

Ләкин үҫә килә баланың организмында күкрәк һөтөндә булмаған аҙыҡтарға ла талаптар тыуа башлай.

Тыуған көнөнән алып 5-6 айға тиклем балаға тик күкрәк һөтө генә бирәләр. 4 айлыҡ булғас балаға емеш-еләк һыуы ҡайнатмаһынса эсерәләр һәм, врачтың кәңәше буйынса, балыҡ майы бирә башлайҙар.

Бала 5—6 айлыҡ булғас, уға әсә һөтө генә етмәй башлай. Шул ваҡыттан алып, баланы аҙлап-аҙлап яңы ашҡа өйрәтә башлайҙар.

6 айлыҡ балаға тәүлеккә дүрт тапҡыр күкрәк һөтө һәм бер тапҡыр бутҡа йәки кеҫәл ашаталар. Шунан өҫтәп, һөт имеҙгән саҡта, көнгә бер тапҡыр 3—4 бал ҡашығы ҡайнатма емеш-еләк һыуы эсерәләр.

7 айлыҡ булғас, бер тапҡыр һөт имеҙеүҙе тағы ла башҡа ашау ашатыу менән алыштырырға мөмкин.

9—10 айлыҡ булғас балаға тәүлеккә 3 тапҡыр бутҡа, кеҫәл, йәшелсәнән әҙерләнгән аш, һурпа менән сохари һәм башҡа шундай аҙыҡтар ашаталар, ә күкрәк һөтөн тәүлеккә ике тапҡыр ғына бирәләр.

Баланы шул рәүешсә ашатыуҙы бер йәшкә тиклем дауам иттерәләр. Шунан һуң ғына күкрәк һөтөнән айыралар. Быны өсөн түбәндәгесә эшләйҙәр: әгәр бала тәүлеккә ике тапҡыр күкрәк һөтө имһә, уның береһе туҡтатылыла, уның урынына бер тапҡыр имеҙеү бер бал ҡашығы шәкәр һалынған, өҫтө алынмаған бер стакан һөт менән алыштырыла. 3—4 көндән һуң имеҙеү тағы ла шәкәрле һөт менән йәки башҡа берәй аҙыҡ менән алыштырыла.

Баланы күкрәктән айырғас, уға шыйыҡ аҙыҡты аҙлап-аҙлап ҡуйыраҡ аҙыҡ менән алыштырырға кәрәк. Әгәр ул һөттө яратмаһа, көнөнә бер стакан һөт менән бирергә кәрәк. Бешереп торған бутҡаны тәүлеккә дүрт тапҡыр ашатыу кәрәк. Бинт аҫтына мамыҡ һалына. Әгәр ҙә әсә ошо кәңәштәргә тотһа, уның күкрәгенә бер нисә көндән һуң һөт тешмәй башлаясаҡ.

Йәй көнө баланы күкрәктән айырырға ярамай. Йәй көнө баланы ҡыҙыу эҫе көнгә түгел бәлки, уны ҡышҡылсы, һауа торғонда ашаталар. Был ауырыуҙар булмаһа, бала ауырыуға тыуһа, күкрәк һөтө—был ауырыуҙы булдырмау һәм уҡан дауалау өсөн иң яҡшы саралар. Быйыл шуны өсөн күкрәк һөтө бирелергә тейеш, тәүлеккә бер нисә ашатыу ғына кәрәк. Шуның өсөн дә, әгәр балаға яҙ йәки йәй бер йәш тулһа, күкрәк тиклем тәүлеккә һауалы бирергә тейеш, имеҙеүҙе дауам иттерергә кәрәк.

Әгәр ҙә бала сирле икән, шулай уҡ уны күкрәктән айырырға ярамай.

Башҡаса бөтә хәлдәрҙә лә балаһы имеҙеүҙән 9 айҙа йәки бер йәшендә айырырға кәрәк.

Әсәләр тағы ла тулыраҡ кәңәште балалар консультацияһы аша баланың йәки медицина участкаһы работниктарынан алырға тейештәр.

Г. Н. Сперанский,
Медицина фәндәр академияһының действительный члены, профессор.

Промышленносҡа йәш кадрҙар

Ошо көндәрҙә Өфө ҡалаһындағы һөнәрселек училищеләренең уҡыу һәм хеҙмәт отличниктәренең слеты булып үтте. Бында буласаҡ квалификациялы токарҙар, слесарҙар, механиктәр, энергетиктәр, полиграфистәр, балта оҫталары, һәр төрлө һөнәр кешеләре йыйналдылар. Тиҙҙән уларҙың күптәре уҡыуҙарын тамамлап, һағынып көткән заводтарына, халыҡ хужалығының төрлө тәҙәлештәренә данлы һәм маҡтаулы хеҙмәткә таралаcаҡтар.

Уҡыу һәм хеҙмәт отличниктәре 1947—1948 уҡыу йылының йомғаҡтары һәм экзамендарға әҙерлектең торошо тураһындағы мәсьәләне тикшерҙеләр. Был мәсьәлә буйынса СССР хеҙмәт резервтәре Министерствоһының Башҡортостан управлениеһы начальнигы вазифаһын үтәүсе иптәш Синцов доклад менән сығыш яһаны. Ул ҡалалағы һөнәрселек училищеларенда уҡытыу-производство һәм тәрбиә эштәренең торошо тураһында һөйләне.

Ағымдағы йылда республиканың һөнәрселек училищеләре халыҡ хужалығына ике меңдән артыҡ квалификациялы йәш эшсе бирәсәк. Тиҙҙән училищеларҙе тамамлаусыларға, шулай уҡ өлкән кластарға күсеүселәргә экзамендәр башлана. Һәр бер училище коллективы уны «яҡшы», «отлично» билдәһенә генә үткәреү өсөн көрәшергә тейеш. Өсөнсө, туғыҙынсы, унынсы, ун беренсе, ун өсөнсө номерле һәм башҡа ҡайһы бер училищелар был экзамендарға яҡшы әҙерлек менән киләләр. Уларҙа уҡытыу, производство эштәре программаһын үтәү, дәрестән өлгәшеү юғары ҡуйылған. Мәҫәлән, энергетиктәр әҙерләүсе 9-сы номерле һөнәрселек училищеһендә отличниктәр 62 кеше тәшкил итә. Быйыл был училище промышленносҡа квалификациялы 169 йәш эшсе — электр эше буйынса слесарҙар, пар турбиналары машинистәре ярҙамсылары, монтерҙар сығараcаҡ.

Слетта һөнәрселек училищеләренең уҡыуҙан яҡшы өлгәшеүсе отличниктәре Хоменко, Панкратов, Липатов, Чепуре, Пермякова һәм башҡаларға — бөтәһе 17 уҡыусыға СССР хеҙмәт резервтәре Министерствоһының почет грамоталары, 10 отличникҡа ВЛКСМ Өлкә Комитетының почет грамоталары тапшырылды.

Отличниктәр көслө һәм оҙаҡҡа һуҙылған алҡыштар аҫтында бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға котлау хаҡы ҡабул иттеләр.

Г. Әмир.

Слесарҙәр, штукатурсылар

Черниковск ҡалаһындағы беренсе номерле ФЗО мәктәбендә экзамендәр тамамланды. Мәктәпте тамамлаусыларҙың күпселек өлөшө экзаменда дүртенсе разрядҡа тапшырҙы.

24 уҡыусы, шуларҙан: слесарлекка тамамлаусылар Симанов, Николаенко, Карманов, Заборов, штукатурсы — Грешняков, Мехаматьянов, ташсы — Кондратец, балта оҫтаһы — Платонов һәм башҡалар профессияларҙы яҡшы үҙләштергәндәре өсөн маҡтау грамоталары менән награландылар.

Мәктәп йәш эшселәр әҙерләү һәм уларҙы производствоға тапшырыу планын тулыһынса үтәне. Управляющие иптәш Башилов булған трест йәш эшселәрҙе айырыуса яҡшы ҡабул итте. Улар эшкә урынлаштырылдылар, инструменттәр һәм яҡшы торлаҡтар менән тәьмин ителделәр. Шулай уҡ машиналар төҙөү заводында ла йәш эшселәрҙе яғымлы ҡаршыланылар.

В. Памирский.

Шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрен яҡшы тәрбиәләргә

Республикабыҙҙың колхоздары шәкәр сөгөлдөрө сәсеүҙе тамамланылар. Күпселек колхоздар быйыл сәсеүҙе үҙған йылға ҡарағанда иртәрәк сроктарҙа һәм яҡшы сифатлы итеп үткәрҙеләр.

Сәсеү — ул юғары урожай өсөн көрәштә тәүге этап ҡына. Шәкәр сөгөлдөрө айырыуса яҡшы тәрбиә талап итеүсе культура ул.

Башҡортостандың сөгөлдөр үҫтереүсе мастерҙәре сөгөлдөр плантацияларына үҙ ваҡытында яҡшы тәрбиә булғанда ғына уларҙан юғары урожай алырға мөмкин икәнлеген үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән күрһәттеләр. Мәҫәлән, Ҡырмыҫҡалы районы «Иҙел» колхозында Социалистик Хеҙмәт Геройы звеновод иптәш Банат Батырова үҙған йыл ике гектар майҙанда шәкәр сөгөлдөрөнөң һәр бер гектарынан 611,5-әр центнер урожай алды. Ул был өлгәшеүгә сөгөлдөр плантацияларында арыу-талыуҙы белмәй, күп хеҙмәт һалып эшләү һөҙөмтәһендә ирешә. Сөгөлдөр шытып сығыу менән уҡ рәт араларына йомшартыу үткәрҙе, ә 15 июндән алып рәттәрҙә үҫемлектәргә һирәгәйтеү башланды. Ә 2 июлдән үҫемлектәрҙе тикшереү һәм тупраҡты йомшартыу, унан һуң сәсеүлектәргә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрелде.

Был звено быйыл үҙенә беркетелгән участканан тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн көрәшә. Плантацияла бер ҡарацығынан икенсе ҡарацығға тиклем ҡыҙыу эш бара. Ғафури районы «Вольная жизнь» колхозында ла был культураны ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр. Бында рәт араларын йомшартыу тамамланды һәм үҫемлектәрҙе һирәгәйтеү башланды.

Ләкин республика буйынса шәкәр сөгөлдөрө үҫтереүсе колхоздарҙа сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәренең торошо һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Бөҙәйәз, Архангель районы колхоздары ошо көнгә тиклем был эшкә башламағандар. Район ауыл хужалығы бүлеге работниктәре, МТС һәм колхоз етәкселәре һис кисекмәҫтән шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрен яҡшы тәрбиәләүҙе ойошторорға тейештәр.

Сөгөлдөр шытып сығыу менән уҡ, уның рәт араларын йомшартырға һәм ул эште 3—4 көн эсендә тамамларға кәрәк. Йомшартыу иң тәү ҡый үләндәре айырыуса күберәк булған участкаларҙа үткәрелергә тейеш. Ҡый үләндәре булмаған урындарҙа был эште машиналар йәки ат көсө менән, ә сүпле урындарҙа ҡул менән үткәрергә кәрәк.

Сәсеүлектәрҙе һирәгәйтеү сөгөлдөрҙөң тәүге ике пар япрағы сығыу менән уҡ башланырға һәм ул дүрт көн эсендә тамамланырға тейеш. Иң яҡшы үҫеүсе үҫемлектәр ҡалдырыла, ә ҡалғандары йолҡоп ташлана. Үҫемлектәрҙең аралары бер-береһенән 18 сантиметр булырға тейеш. Һирәгәйтеүҙе уның эргәһендәге рәткә ҡарап үткәрергә һәм үҫемлектәрҙе шахмат тәртибендә ҡалдырырға кәрәк. Шулай эшләү үҫемлектәргә тупраҡта булған туҡлыҡлы матдәләрҙе яҡшы файҙаланырға мөмкинлек бирәсәк.

Һирәгәйтеүҙән һуң бер аҙна ваҡыт үткәс, үҫемлектәрҙе тикшерә башларға кәрәк. Был бик яуаплы эш. Һәр бер гектарҙа кәмендә 100 мең төп сөгөлдөр ҡалдырылырға тейеш.

Үҫемлектәргә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәреү юғары урожай алыуҙа ҙур роль уйнай. Сөгөлдөр сәсеүлектәренә хатта минималь нормала минераль ашламалар индергәндә лә ул урожайҙы һәр гектарға 30—40-ар центнер артыҡ бирә.

Ағымдағы йылда государство сөгөлдөр үҫтереүсе колхоздарға күп кенә минераль ашламалар бирҙе һәм был ашламаларҙы һатып алыу өсөн кредит бүлде. Колхоздар был мөмкинлектәрҙе тулыһынса файҙаланырға тейештәр. Минераль ашламалар менән бергә урындағы ашламаларҙы ла киң файҙаланырға кәрәк. Сөгөлдөр сәсеүлектәрен беренсе тапҡыр аҙыҡландырыу һирәгәйтеүҙән һуң уҡ үткәрелә. Һәр бер гектарға 4-әр тонна тирес шыйыҡсаһы һәм берәр центнер суперфосфат индерелә. Икенсе тапҡыр аҙыҡландырыу үткәргәндә һәр бер гектарға 1,5-әр центнер суперфосфат, 0,6-шар центнер калийле тоҙ, 0,5-әр центнер аммиак селитраһы индерелә. Өсөнсө тапҡыр аҙыҡландырыу рәт аралары тоташырҙан алда һәр бер гектарға 1,5-әр центнер суперфосфат, 0,75 центнер калийле тоҙ индерелә.

Шәкәр сөгөлдөрө плантацияһы бөтә йәй буйына ҡый үләндәренән таҙа, ә тупраҡ йомшаҡ хәлдә торорға, рәт аралары кәмендә өс тапҡыр йомшартылырға тейеш. Был эшкә МТС-тарҙа булған трактор культиваторҙарын киң ҡулланырға кәрәк.

Ҡоро һәм эҫе көндәр шәкәр сөгөлдөрө сәсеүлектәрендә төрлө ҡоротҡостарға үрсеүгә уңай шарттар тыуҙыра. Ҡырмыҫҡалы районының айырым колхоздарында сөгөлдөр сәсеүлектәрендә сөгөлдөр бөрсәһе һәм оҙон моронло сөгөлдөр ҡондоҙҙары барлыҡҡа килде. Был ҡоротҡостарҙы тиҙ арала юҡ итеү һәм уларҙы булдырмау өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш.

Ҡоротҡостар күренгән бөтә участкаларҙа һәр бер гектарға 8—10 килограмм иҫәбенән кремнефторлы натрий, 20 килограмм иҫәбенән дуст-гексохлоран ҡулланырға кәрәк. Улар иртә менән елһеҙ ваҡытта һибелергә тейеш. Быны өсөн махсус аппаратура булмағанда, һирәк туҡыманан тегелгән тоҡтарҙы файҙаланырға мөмкин.

Сәсеүлектәрҙе үҙ ваҡытында яҡшы итеп тәрбиәләүҙә звеноларҙа хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу хәл иткес роль уйнай. Һәр бер звено членына айырым участка бүлеп бирелергә тейеш. Был звено членддары араһында сәсеүлектәрҙең торошо һәм эштең сифаты өсөн яуаплылыҡты арттыра. Район ауыл хужалығы бүлеге һәм МТС агрономдары был эштә колхоздарға ҙур ярҙам күрһәтергә тейештәр.

Р. Рогова,
БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының шәкәр сөгөлдөрө буйынса агрономы.

Ҡарағай сайырын әҙерләү

Ҡарағай сайырын (живица) химик эшкәртеп, унан нигеҙҙә канифоль һәм скапидар етештерелә. Канифоль һәм скапидар һабын ҡайнатыу, лак-быяу, күн, фармацевтик, электротехник һәм башҡа промышленность тармаҡтарына китә. Скапидарҙе артабан эшкәртеү һөҙөмтәһендә камфара һәм башҡа шундай продукциялар алып була.

СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы менән күҙҙә тотолғанынса илебеҙҙә 1950 йылда сайыр әҙерләү 1945 йылдағыға ҡарағанда ике ярым тапҡырға артасаҡ. Быларҙан сайырҙың халыҡ хужалығында ниндәй ҙур әһәмиәт тотҡанлығы асыҡ күренеп тора.

Республикабыҙҙа сайыр әҙерләү һәм унан канифоль, скапидар эшкәртеү эштәре башлыса промкооперацияның Башлесхимпромсоюз системаһына йөкмәтелгән. Система үҙенең артелдәре аша быйыл план буйынса 320 тонна сайыр әҙерларгә тейеш. Күп хеҙмәт талап иткән был эш майҙың һуңғы числоларынан башланды һәм ул сентябрь айына тиклем дауам итәсәк.

Уны әҙерләүгә ҡарата артелдәр мастерҙәр, эшсе көстәре һәм ағас мискәләр менән тулыһынса тәьмин ителгән булһалар ҙа, ләкин башҡа яҡтан әҙерлек һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Бүленгән һәм ҡабул ителгән урманлыҡтарҙа ҡарағай ағастарының сайыр алыуға 89 проценте генә әҙерләнгән. Сайыр ағып торған махсус һауыттарҙың 29 проценте генә ағастарға урынлаштырылған.

Бигерәк тә махсус ҡасауҙар етешмәй. Уларҙы булдырыу өсөн ашығыс саралар күрелергә тейеш.

Промышленность Башлесхимпромсоюз промартелдәре работниктәренән юғары сифатлы урман-химик продукциялары талап итә һәм ул үҙ ваҡытында бирелергә тейеш.

К. Охотский,
Башлесхимпромсоюздың баш инженеры.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Венгрияның репарацион түләүҙәрен кәметеү тураһында Совет Хөкүмәтенең карарына Венгрия матбуғатының откликтәре

БУДАПЕШТ, 9 июнь. (ТАСС). Бөгөнгө иртәнге һәм киске газеталарҙың барыһы ла Венгрия хөкүмәтенең репарацион түләүҙәре кәметеү тураһындағы үтенесенә яуап итеп СССР Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов яуабының тексын беренсе биттәрендә баҫып сығарҙылар.

Газеталар Совет Хөкүмәтенең карарына баш мәкәләләр һәм редакцион мәкәләләр арнайҙар. «Сабад Неп» газетаһы: Советтар Союзы ҙур киңлеле һәм дуҫтарса ярҙам итте. Венгрия репарацияһы буйынса СССР-ға түләргә тейешле булған 2 миллиард самаһы форинт срыстан түләнмәй. Был сумма илдең хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға файҙаланылырға тейеш.

«Советтар Союзы, — тип яҙа «Сабад Неп» газетаһы,—Венгрияның тиҙерәк күтәрелеүен теләй. Ул венгер халҡына, халыҡ демократияһына Венгрияның дуҫтарса ярҙам күрһәтә. Репарацияларҙы кәметеү тураһындағы карар венгер халҡына ҙур ярҙам, ә мораль һәм политик яҡтан иһә ул икеләтә ҙур ярҙам. Венгрия демократияһына яңы ярҙам. Венгрия Советтар Союзының ҡарашы аша ярҙам алған, иҫке реакцион политиканың ... Каллаи режимы ваҡытында Надь Ференц дауам иттерергә тырышкан «качелдар политикаһының» асылына иғтибар итергә тейеш ине. Венгрия башҡаса политика. Советтар Союзы менән дуҫлыҡ политикаһы».

«Сабад Неп» артабан былай тип яҙа: реакцион антисоветсылар Венгрияның бойондороҡһоҙлоғон ҡорбан итергә теләүҙәренә, Советтар Союзы һөжүм итеү өсөн уны яңынан плацдармға әйләндерергә теләүҙәренә Венгрия демократияһы ҡаршылыҡ күрһәтә алды. Совет-Венгрия араһында дуҫлыҡ һәм ярҙамлашыу тураһындағы договор,—тип яҙа газета,— беҙҙең илдәребеҙ араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытты, хәҙергә ваҡытта союз тыуҙырҙы. Репарациялар суммаһын яртылаш кәметкән Советтар Союзының беҙҙең халыҡҡа булған был ҙур ярҙамы ярҙамһыҙ булыуы мөмкин: дуҫлыҡ дуҫлыҡ менән, бирелгәнлеккә бирелгәнлек менән яуап бирербеҙ. Беҙҙең эшселәребеҙ һәм крәҫтиәндәребеҙ үҙҙәренең азатлығы, бойондороҡһоҙлоғо өсөн, халыҡ демократияһы өсөн, ... ил ... һәм граждандар ... Совет Хөкүмәтенә ... эшкә күрһәтер. Беҙ был ышаныслы булырбыҙ».

Азатлар газета, Советтар Союзы Хөкүмәте үҙенең киң күңелле ... менән бөтә донъяла тыныслыҡ һәм ... репарацияларҙы кәметеп Совет Хөкүмәте Венгрия демократияһының ... Венгер халҡы, — тип яҙа «Непсава» газетаһы, — Советтар Союзының дуҫтарса карарын рәхмәт һәм ихтирам менән ҡаршылай. Советтар Союзына рәхмәт, Советтар Союзының халыҡтарына рәхмәт, Советтар Союзының һалдаттары беҙҙең халыҡыбыҙҙы фашистар иҙеүенән коткарҙылар.

Совет Хөкүмәтенең карары тураһында Румыния матбуғаты

БУХАРЕСТ, 9 июнь. (ТАСС). Бөгөн Румынияның иртәнге газеталарының бөтәһе лә беренсе биттәрендә: «Румыния республикаһы Советтар Союзына түләргә тейешле булған репарацион сумманы Совет Хөкүмәте 50 процентка кәметте», «СССР беҙҙең халыҡ хужалығыбыҙҙы аяҡҡа баҫтырыуҙы еңеләйтә», «СССР Румынияның экономикаһын нығытыуға һәм тиҙ рәүештә үҫтереүгә булышлыҡ күрһәтә» тип яҙалар. Румыния хөкүмәтенең репарацияларҙы кәметеүҙе һорап яҙған хатына Генералиссимус И. В. Сталиндең яуабын баҫып сығаралар.

Газеталар Генералиссимус Сталиндең портретын күренекле урынға урынлаштыралар.

К. Готвальд— Чехословакия президентлегенә кандидат

ПРАГА, 9 июнь. (ТАСС). Бөгөн кис Прага радиоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Чехословакия коммунистар партияһының Үҙәк Комитеты Милли фронттың хәрәкәт итеү Үҙәк Комитетенә Чехословакия республикаһы президенте посына Клемент Готвальд кандидатураһын тәҡдим иткән. Милли фронттың хәрәкәт итеү Үҙәк Комитеты был тәҡдимде Чехословакия коммунистар партияһы Үҙәк Комитете президиумы менән информация министры Копецкий тапшырған.

Чехословакия коммунистар партияһының Үҙәк Комитете премьер-министр посына премьер-министрҙың хәҙерге урынбаҫары, профсоюздар Үҙәк Комитетенең председателе Запотоцкийҙы тәҡдим итергә бер тауыштан карар кабул итте.

Палестинала һуғыш хәрәкәттәре

ПАРИЖ, 9 июнь. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Тель-Авивтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, официаль сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәр буйынса Латрун фронтындағы хәл еврей ғәскәрҙәре файҙаһына уңайлы рәүештә үҙгәрә. Иерусалим — Тель-Авив юлы өсөн һуғыштың нисек бөтөүе ошо фронттағы хәлгә бәйләнгән. Өҫтәмә көстәр килеүгә ҡарамаҫтан, ғәрәп легионы юғалтҡан позицияларын кире ҡайтарып ала алмаған.

Шул уҡ сығанаҡтарҙан алынған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, Сирия һәм Ливан сик буйҙарында төньяҡ фронтта һуғыштарҙың үҫеүе бик өмөтлө баһалана; Сирия ғәскәрҙәренең юғалтыуҙары күп кенә. Еврейҙәрҙең артиллерияһы фронттың күп кенә участкаларында утты байтаҡ көсәйткән.

Төркия хөкүмәтенең отставкаға сығыуы

СТАМБУЛ, 9 июнь. (ТАСС). Сака кабинете отставкаға сыҡты. Ләкин яңы кабинет төҙөү яңынан Сакаға тапшырылған.

Пионерҙар йәйе

Урмаѳбишҡаҙаҡ балалар йортоноң Александр Матросов исемендәге пионерҙар дружинаһынан бер генә уҡыусы ла класында ҡалманы. 38 пионер уҡыу йылын барыһы отличноға ғына тамамланы.

Өлкән вожатый Вәлиева Зөлхиҗә менән дружина советы председателе Әсәнов Әхәт йәйге эш планы төҙөнөләр.

План буйынса бер төркөм пионер Ишембай нефть промыселдарында, Стәрлетамаҡ сода заводында экскурсияла булдылар. Оҙаҡламай районыбыҙ буйынса бер аҙналыҡ походҡа сығалар.

Пионерҙар бөжәктәр һәм үҫемлектәр коллекциялары, гербарийҙәр яһайҙар, дарыу үләндәре йыйнайҙар. Улар Ишембай ҡала аптекаһына килтерелгән 200 килограмм дарыу үләне тапшырырға йөкләмә алдылар.

Тиҙҙән колхоз баҫыуҙарында утауҙар башланасаҡ. Дружина Советы күрше «Тратау» колхозы менән һөйләшеп, утау өсөн айырым участка алды.

З. Ямалетдинова.

Футбол

Өфө—Куйбышев

9 июнда быйылғы футбол сезонының иң ҡыҙыҡлы уйындарының береһе — «Динамо» (Өфө) һәм «Хеҙмәт резервтәре» (Куйбышев) командалары араһында РСФСР беренселеге өсөн осрашыу булып үтте. 10 меңгә яҡын тамашасы ҙур ҡыҙыҡһыныу менән был осрашыуҙы күҙәтте.

Беренсе тайм (уйындың тәүге яртыһы) һөҙөмтәһеҙ, бер командала отмауы менән бөттө. Икенсе таймдың башынан уҡ ҡунаҡтар көслө һөжүмгә күсәләр. Бик көслө бәрелгән бер инсә тупты динамосыларҙың вратаре Сгибнев тотоп ала. Тайм уртаһында ҡунаҡтар бик матур комбинациялы һөжүм яһап тупты штанга аҫтына, кире ҡаға алмаҫлыҡ көс менән, бәреп индерҙеләр. Былай ҙа бик көслө барған уйын темпы тағы ла көсәйә. Ҡунаҡтарҙың арығанлығы һиҙелә башлай. Футбол майҙанының хужалары хәл иткес һөжүмгә күсәләр. Һуңғы минуттарҙа уйын күберәк ҡунаҡтар ҡапҡаһы янында бара. «Динамо» бөтә командаһы менән һөжүм итә. Уйын бөтергә биш минут самаһы ваҡыт ҡалғас, Макаров биргән тупты Бавилов ҡунаҡтар ҡапҡаһының һул яҡ мөйөшөнә ебәрә. Вратарь тупҡа ташланырға өлгәрә алмай. Динамосылар уйын бөткәнгә тиклем көслө һөжүмдәрен дауам итәләр. Ләкин уйын иҫәбен үҙ файҙаларына арттыра алмайҙар. Уйын, шулай итеп, 1 : 1 иҫәбе менән бөттө.

Өфө ҡалаһын төҙөкләндереү



Һүрәттә: Крупская урамына таш йәйеү өсөн грейдер юлды тигеҙләү ваҡыты.
Архипов фото[illegible]

Драматургтар кәңәшмәһе

Башҡортостан совет яҙыусылары Союзының драматургия секцияһы И. Абдуллиндың «Девон» пьесаһы тураһында кәңәшмә үткәрҙе. Кәңәшмәлә сығыш һөйләүсе иптәштәр, «Девон» пьесаһы тураһында һөйләү менән генә сикләнмәйенсә, башҡорт совет драматургияһы алдында торған мөһим бурыстарға ла ҡағылдылар.

«Девон» пьесаһы — үҙенең яңы тематикаһы, алынған конфликттең мөһимлеге менән беҙҙең драматургияла ыңғай күренеш, һәм был теманы хәл итеүҙә йәш автор ҙур ҡыйыулыҡ, байтаҡ оҫталыҡ күрһәткән. Ошо ыңғай яҡ менән бергә, пьесаның күп кенә етешһеҙ яҡтары ла бар.

Кәңәшмәне асыусы Рәшит Ниғмәти, сығыш һөйләүсе Ә. Ча[illegible] Ғ. Зөлҡәрнәев, Х. Х[illegible] С. Агиш һәм башҡа иптәш[illegible] саның шундай етешһеҙ[illegible] күрһәтеп үттеләр: «Девон» [illegible] нең сюжет ҡоролошо [illegible] алынған образдар күбеһен[illegible] матик эшләнгәндәр, совет [illegible] рена хас, иң яҡшы сифаттар[illegible] кә деталдәрҙә бирелмәгән.

Шулай уҡ аҫарҙе сәхнәгә [illegible] сы режиссер һәм Башҡорт [illegible] мия театры адресына урын[illegible] ҡит һүҙҙәре әйтелделәр.

Драматургтарҙың [illegible] яҙыусылар алдында торған [illegible] бурыстарҙы асыҡланы. Бе[illegible] шикһеҙ, республикаһың XXX [illegible] лығына ҡарата уларҙың [illegible] эшендә сағыласаҡ.

Паркты тәртипкә килтерергә

29 майҙа Матросов исемендәге культура һәм ял паркы асылды.

Ләкин парк асылыу көнөнә әҙерлекһеҙ килгән. Уҡыу залы асылмаған; юлдың ике яғына эленгән сак-саҡ танылырлыҡ лозунгыларҙы иҫкә алмаһаң, бында бер нәмә лә юҡ. Паркта шахмат залы булырға тейеш. Ләкин бында ул юҡ. Юлдарға, ҡом урынына таштар һибелгән; элекке [illegible] дарҙан бары бағаналар ғына [illegible] тап, физкультура майҙанда[illegible] типкә килтерелмәгән. Ашх[illegible] эсемлек һатыу ойошторол[illegible]

Былдай хәлдә паркта ҡул[illegible] лы ял итеү мөмкин түгел.

Ә. Калме[illegible]

БЕЛДЕРЕҮ

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы канцелярияһы Пушкин урамы, Министрҙар Советы йорто, икенсе ҡат, 80-се номерле бүлмәгә түбәндәге иптәштәрҙе (ҡарт большевиктәрҙе) Иван Георгиевич Семенов, Каролина Яковлевна Петерсон, Дмитрий Васильевич Романов, Ефим Леонтьевич Дымов иптәштәрҙең килеүҙәрен һорай.

Юғарыла күрһәтелгән ки[illegible] ҙең адрестәрен белеүселәр[illegible] 83—77 номерле телефон бу[illegible] хәбәр итеүҙәре һорала.

Башҡорт АССР-ы Вер[illegible] Советы Президиумы ка[illegible] рияһы.

Яуаплы редактор урынба[illegible] З. Ю. ВАХИТОВ.

КӨЙӨРГӘҘЕ ЗООВЕТТЕХНИКУМЫ

1948—1949 уҡыу йылына

УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ

Техникум урта квалификациялы зооветтехниктәр һәм ветеринарный фельдшерҙар әҙерләй. Техникумға урта мәктәптең йәки тулы булмаған урта мәктәптең 7 класын тамамлаған, 14—30 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм ирҙәр ҡабул ителәләр.

Уҡырға инергә теләүселәр, түбәндә күрһәтелгән документтәрҙе беркетеп, үҙен мәктәпкә ҡабул итеү тураһында, директор исеменә, ғариза бирәләр:

а) Йәше тураһында метрика, б) 7 класты тамамлауы тураһында таныҡма, в) һаулығы тураһында таныҡма, г) паспорт һәм хәрби билет үҙе менән бергә алып килене.

Мәктәпкә ҡабул итеү өсөн ғаризалар ошо йылдың 5 июненән 31 июлгә тиклем ҡабул ителәләр.

Уҡыу срогы 3 йыл.

Техникумға инеүселәргә түбәндәге фәндәрҙән һынауҙар үткәреләсәк: рус теленән (телдән һәм диктант), математиканан (телдән һәм яҙма) һәм СССР Конституцияһы буйынса.

Техникумға ҡабул итеү өсөн һынауҙар 1 августан 20 августа тиклем дауам итәсәк. Уҡыуҙар 1 сентябрҙән башлана. Техникумға алынған кешеләр бөтәһе лә (беренсе курста 140 һум, икенсе курста 160 һум, өсөнсө курста 180 һум күләмендә) стипендия менән тәьмин ителәсәктәр.

Отличниктарға стипендия 25 процентҡа артыҡ бирелә. Тулы булмаған урта мәктәпте 1947—1948 уҡыу йылында, төп предметтәрҙән отличноға тамамлаусылар һынауһыҙ алыналар. Уҡыусылар уҡыған өсөн техникумға йылына 150 һум аҡса индерәләр (50 проценте мәктәпкә ингәндә һәм 50 проценте 1949 йылдың февраленда).

Уҡыу өсөн түләүҙән түбәндәге кешеләр ҡотҡарылалар: а) Совет Армияһынан ҡайтҡан кешеләр, б) Совет Армияһында хеҙмәт итеүселәрҙең тәрбиәһендәгеләр, в) пенсия алыусыларҙың балалары.

Техникумдың махсус столовойы бар.

Адрес: Башҡорт АССР-ы Ермолаевка, Көйөргәҙе районы, зооветтехникум.

Дирекция.

ӨФӨ ПЕДАГОГИЯ УЧИЛИЩЕҺЕ

1948—1949 уҡыу йылына

Уҡыусылар ҡабул итә

Училищеның мәктәпкәсә йәштәге балалар учреждениеларе өсөн тәрбиәселәр әҙерләү (уҡыу срогы 3 йыл) һәм уҡытыусылар—урта һәм тулы булмаған урта мәктәптәр өсөн өлкән пионервожатыйҙар әҙерләү бүлектәре бар.

Уҡыу срогы 4 йыл.

Уҡытыусылар бүлегенә 14—30 йәштәге һәр ике енес граждандары, ә мәктәпкәсә тәрбиә бүлегенә ҡатын-ҡыҙҙар ғына ҡабул ителәләр.

Училищеға инеүселәр 7 йыллыҡ мәктәп программаһы күләмендә СССР Конституцияһынан, рус теленән һәм математиканан һынау үтәләр.

Ҡабул итеү һынауҙары 1 августа, уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Училищеға ҡабул ителеүселәр стипендия менән һәм бик мохтаж булғандары — дөйөм торлаҡ һәм постель әйберҙәре менән тәьмин ителәләр.

Ғаризалар 1 августа тиклем ҡабул ителә.

Ғаризаға түбәндәге документтәр: белем тураһында таныҡма (подлинникта), йәше тураһында таныҡма, һаулыҡ тураһында врач справкаһы, автобиография һәм өс фотокарточка беркетелергә тейеш.

Ғаризалар ебәреү һәм белешмәләр алыу өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Киров урамы, 37-се номерле йорт, педагогия училищеһе.

Белешмәләр һәр көн һайын иртәнге 9 сәғәттән киске 5 сәғәткә тиклем бирелә. Телефон номеры: 2-90-44.

Дирекция.

Ғүмерҙе страховать итеү

16—60 йәштәге кешеләр страховать ителәләр. Страхование билдәһеҙ срокҡа — ғүмерлеккә төҙөлә. Теләгән суммаға страховать ителергә мөмкин.

3 мең һумға тиклем страхование договорҙарын яҙышыу өсөн сәләмәтлек тураһында врач справкаһы кәрәкмәй.

Ғүмерлеккә страховать ителеүселәргә берәр төрлө бәхетһеҙлеккә осрап, хеҙмәткә һәләтлеген юғалтҡан хәлдә, Госстрах страхование суммаһын страховать ителгән кешенең үҙенә, ә страховать ителгән кеше үлгән ваҡиғала — страховой документта күрһәтелгән кешегә түләй.

Белешмәләр алыу өсөн Госстрах инспекцияһына йәки страховой агентҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Башгосстрах.

Угрюмдағе геология-разведка партияһына өлкән һәм смена мастерҙары, шулай уҡ механик колонкалы борауләу өсөн эшселәр талап ителә.

Эш шарттары килешеү буйынса.

Белешмәләр алыу өсөн түбәндәге адреска мөрәжәғәт итергә: БАССР, Покровка районы, Ҡариҙел буйындағы Угрюм пристане.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе

П. И. Чайковский исемендәге Мәскәү Государство консерваторияһы ҡаршыһындағы башҡорт студияһы

1948—49 уҡыу йылына

СТУДЕНТТӘР ҠАБУЛ ИТӘ

Ике енестән дә 19—26 йәштәр араһында булған башҡорт һәм татар йәштәре ҡабул ителә.

Студияға инергә теләүселәр яҡшы вокаль мәғлүмәтле, музыкаль ишетеүле, музыкаль хәтерле, сценик мәғлүмәтле һәм 7-се кластан да түбән булмаған белемле булырға тейештәр. Уҡыу срогы 5 йыл. Студенттәр государство стипендияһы менән тәьмин ителәләр.

Ғариза һәм документтәрҙе түбәндәге адрес менән ебәрергә:

Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 5-а номерле йорт. БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе.

Ғаризалар ошо йылдың 10 августына тиклем ҡабул ителәләр.

БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһе.

Ҡала малярия станцияһы малярия серәкәйҙәренең күкәйҙәренә ҡаршы көрәшеү маҡсатында 1948 йылғы сезонда июндән башлап октябргә тиклем республика малярия станцияһы тарафынан һаҙлыҡтарға самолеттан ағыу һиптереү үткәреләсәген белдерә.

Был эш Өфө ҡалаһынан биш километр алыҫлыҡтағы зонала, Октябрь революцияһы исемендәге затон, Миловка, Михайловка, Алексеевка, Романовка, өйрәнеү аэродромы, элекке 9-сы номерле совхоздың ҡала яны хужалыҡтары, Александровка, Базилевка, Өфө ял йорто, Дудкин кисеүе, Жилино, Чесноковка, элекке 5-се номерле совхоздың ҡала яны хужалығы, Нижегородка, Максимовка, Суровка, Тарбеевка, Степановка, Тимашево, Сосновка, Князево, Шакша, Р. Ермаш, Касимово, Елкибаево, Карпов[illegible] Зубово, Дим станцияһы, В[illegible] няково, Баланово һәм Чер[illegible] ковск тирәләрендә тиодиф[illegible] иналамин һәм Париж йәш[illegible] леге һибеү юлы менән үткә[illegible] ләсәк.

Бал ҡорттары булған [illegible] кешеләр бал ҡорттарын ағ[illegible] лауҙан һаҡлау өсөн сара[illegible] күрергә тейештәр.

Умарталарҙы ағыулана[illegible] һыуҙарҙан 7—10 килом[illegible] алыҫлыҡҡа күсерергә кәрәк.

Мал-тыуарҙары булған ке[illegible] шеләр малдарын ағыулан[illegible] һыуҙарға өс тәүлек бе[illegible] ебәрмәҫкә тейештәр.

Беренсе ағыулау 9 июн[illegible] башлап 15 июнгәсә үткәр[illegible] сәк.

Белешмәләр өсөн адрес: Өф[illegible] ҡалаһы, Цюрупа урамы, 7[illegible] номерле йорт. Телефон н[illegible] ре: 2-92-91.

Ҡала малярия станция[illegible]

Редакцияның адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-45, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00170 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 116 12 июнь шәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Венгрия хөкүмәте етәкселәренән И. В. Сталинға, В. М. Молотовҡа һәм Н. В. Шверникҡа телеграммалар. (1-се бит).

Ишембай — Ермолаевка тимер юлы төҙәлешендә. (1-се бит).

ПАРТИЯ ТОРМОШО. С. Федотов. — Партия ойошмаһы производство планын үтәү өсөн көрәш ойошторорға. (2-се бит).

Генеральный Ассамблеяның һуғыш пропагандаһына ҡаршы саралар тураһындағы ҡарарҙарын боҙоу. (2-се бит).

Голландияла ҡоторонҡо рәүештә яңы һуғышты пропагандалау. (2-се бит).

Ғ. Ғаффан. — Илдә электрләштереүҙә Ленин — Сталин идеяларының бөйөк тантанаһы (2-се бит).

СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Яр. Вәлиев. — Совет аппаратының аныҡ һәм оператив эшләүе өсөн көрәшергә. (3-сө бит).

Сәсеүселәргә бер генә ҡыҫылыш та ҡалдырмаҫҡа! (3-сө бит).

Н. Ртищев. — Радиолаштырыу эшенә иғтибар юҡ. (4-се бит).

Израиль государствоһы сит ил эштәре министренең белдереүе. (4-се бит).

Германияға ҡарата алты илдең планы тураһында Америка матбуғаты. (4-се бит).

Бөтә көстө—пар һөрөүгә!

Ауыл хужалығы культураларының урожайлылығын күтәреүҙә пар һәм түңгә һөрөү мөһим саралар. Уларҙы иртә сроктарҙа һәм яҡшы сифатлы итеп эшкәрткән хужалыҡтар арыштан да, шулай уҡ һабан ашлыҡ культураларынан да һәр ваҡыт юғары урожай алып килә. Бына шуның өсөн дә алдынғы колхоздар пар һөрөүҙе мөмкин тиклем иртәрәк срокта үткәреү өсөн саралар күрәләр. Яңауыл, Туймазы райондарының күп кенә колхоздары пар күтәреү планын май айында уҡ тулыһынса үтәнеләр һәм хәҙер ерҙе күберәк дым, туҡлыҡлы матдәләр йыйнау һәм ҡый үләндәрен бөтөрөү өсөн парҙы тәүге ҡат эшкәртеүгә әҙерләп алып баралар.

Парҙы һуңға ҡалып һөрөү был мөһим сараның агротехник ҡиммәтен кәметә. Шуның өсөн дә ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы пар һөрөүҙе Көньяҡ һәм Төньяҡ Кавказда 20 майға, ә башҡа райондарҙа 10 июнгә тамамлауҙы талап итте. Был срок үтте, ләкин республикабыҙҙың күп кенә райондары пар һөрөү эшенә бөтөнләй башламағандар ҙа тиерлек. Благовещен, Бүздәк, Ҡырмыҫҡалы, Абзан, Дүртөйлө райондарында ни бары 100—250 гектар пар күтәрелгән, ул планның 1 — 2 процентын ғына тәшкил итә. Был райондарҙың ауыл хужалығы органдары һәм колхоз етәкселәре был эште һуңғы сроктарға күсереп, үткән йылғы хаталарҙы хәҙер ҙә ҡабатлайҙар. Улар ауыл хужалығы кампанияларын үткәреүҙә зарарлы нәүбәтселеккә юл ҡуялар. Яҙғы сәсеүҙе бөткән колхоздарҙа пар һөрөү ойошторолманы, сәсеү барған ваҡытта уҡ мөмкин була тороп та, тракторҙарҙың һәм йәнле тартыу көстәренең бер ни тиклем өлөшө был эшкә бүленмәне.

Күпселек колхоздарҙың һәм машина-трактор станцияларының яҙғы сәсеүҙе тамамлауҙарына байтаҡ ваҡыт үтте. Ләкин пар һөрөүҙә темп күтәрелмәне. Ҡайһы бер урындарҙа ял итеп алыу настроениеһена юл ҡуйылды, хеҙмәт көсөркәнешлеге түбәнәйҙе. Бына Балтас, Ҡанра, Белорет райондары. Уларҙа пар һөрөүҙе май айының һуңғы аҙнаһында уҡ киң фронт менән алып барырға мөмкин булыуға ҡарамаҫтан, тракторҙарҙың күптәренә техник тәрбиә урынына, ремонт башланды, ә йәнле тартыу көстәре ялға ҡуйылды.

Благовар, Мәләүез, Бөзәйәз, Ауырғазы, Борай райондары ла юл ҡуйғыһыҙ рәүештә артта ҡалалар. Ә бит был райондарҙа пар һөрөү майҙаны ҙур. Уларҙа был эште ваҡытында башҡарыу өсөн мөмкинлектәр ҙә етерлек, ләкин улар файҙаланылмайҙар. Был райондарҙың партия, совет ойошмалары ауыл хужалығы органдарынан, МТС һәм колхоз етәкселәренән пар һөрөү эшен яҡшы итеп ойоштороуҙы һәм планды билдәләнгән срокта үтәүҙе талап итмәйҙәр.

Быйыл арыштан юғары урожай алыу өсөн байтаҡ ҡына саралар үткәрелә. Ҙур ғына майҙандарҙа ужымдар өҫтәмә аҙыҡландырылды һәм тырматылды. Арыш сәсеүлектәренең күренеше бөтә урындарҙа ла юғары урожай вәғәҙә итә. Әгәр ҙә үткән йыл һәр бер колхоз парҙы май айында, июндең тәүге яртыһында уҡ һөрөп ҡалдырһа һәм йәй буйына бер нисә тапҡыр эшкәртһә, урожай тағы ла юғарыраҡ булыр ине. Бына шуға күрә лә киләһе йылда арыштан юғары урожай алыуҙы тәьмин итеү өсөн пар күтәреү планын тиҙерәк үтәүгә хәҙер бөтә көстө туплаҡға кәрәк.

Пар һөрөү темпын бөтә урындарҙа ла ҡырҡа күтәреү өсөн төп иғтибарҙы тракторҙар паркын тулы файҙаланыуға юнәлтергә кәрәк. Сәсеү бөткәс ял итеү, машиналарҙы ремонтҡа ҡуйыу настроениеларе тамырынан бөтөрөлөргә тейеш. Республикабыҙҙың алдынғы трактор бригадалары — Ғөбәйҙуллин (Приют МТС-ы), Социалистик Хеҙмәт Геройы Алехин, Желобецкий, Рогачев (Дәүләкән МТС-ы), Зиязов (Байғужа МТС-ы) һәм башҡа күп кенә иптәштәрҙең бригадалары баҫыу эштәренә төшкәндән бирле тракторҙарҙың эшләп сығарыуҙарын сменанан-сменаға арттыра баралар, сөнки улар техник тәрбиә сараларын ваҡытында үткәрәләр. Бөтә МТС-тарҙа ла һәм бригадаларҙа ла уларҙың тәжрибәһен киң ҡулланырға һәм шуның нигеҙендә эшләп сығарыуҙы ҡырҡа күтәрергә кәрәк. МТС етәкселәре трактор бригадалары менән оператив рәүештә етәкселек итергә, һәр бер машинаның стройҙа булыуын һәм тәүлек әйләнәһенә туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итергә тейештәр.

Күпселек МТС-тарҙа яҙғы сәсеү ваҡытында тракторҙар төнгә сменаларҙа файҙаланылманылар. Хәҙер ҙә был хәл дауам итә. Юл ҡуйғыһыҙ эш. Һәр бер бригада тракторҙарҙы төндә лә көндөҙгө кеүек эшләтергә тейеш. Быға өлгәшеү, бөтә машиналарҙы яҡтылыҡ менән тәьмин итеү, эштең барышына һәм сифатына контроль яһау — МТС етәкселәренең, район ауыл хужалығы бүлеге работниктарының боевой бурысы.

Йәнле тартыу көстәре менән дә пар һөрөү графигының үтәлеүенә һәм арттырып үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк. Ҡайһы бер колхоздарҙа аттар һәм эш үгеҙҙәре пар һөрөүҙә бөтөнләй файҙаланылмайҙар. Ундай колхоздарҙың председателдәре тик тракторҙарға ғына иҫәп тотоп, пар һөрөүҙә иң яҡшы сроктарҙы әрәмгә үткәрәләр. Бөтә урында һабансылар һәм трактористәр араһында нормаларҙы үтәү һәм пар күтәреүҙе яҡын көндәрҙә тамамлау өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерергә кәрәк.

Сифат тураһында бер генә минутҡа ла оноторға ярамай. Пар һөрөүҙә бөтә предплужниктар ҡулланылырға, ер 22—25 сантиметр тәрәнлегендә, сей ҡалдырылмайынса һөрөлөргә тейеш. Агрономдар һәр бер колхозда эштең сифатына ныҡлы контроль ойошторорға, насар эшкәртелгән участкаларҙы яңынан һөрөү сараһын күрергә, агротехниканы боҙоусыларға ҡаршы ныҡлы көрәш алып барырға бурыслылар.

Колхоздарҙағы һәм МТС-тарҙағы бөтә көстө — пар һөрөүгә! Баҫыуҙарҙа стахановсы эш өлгөләре күрһәтеп, киләһе йыл арыш урожайы өсөн ышаныслы нигеҙ һалайыҡ!

ЯҢЫ УРМАНДАР

РСФСР-ҙың урман хужалыҡтары коллективтәре ағас ултыртыу буйынса йыллыҡ планды сроғынан алда үтәнеләр. 90 мең гектар майҙанда яңы урманлыҡтар булдырылды.

Ерҙең өҫкө ҡатламының емерелеүенә ҡаршы көрәш һәм колхоз баҫыуҙарын ҡоро елдәрҙән һаҡлау ҙур ҡолас алды. Ҡара тупраҡлы Үҙәк өлкәләрҙең колхоздарында ағас ултыртҡан майҙан 6 мең гектарға етте. 17 миллион төп имән, ҡайын, ҡарама һәм фрукта ағастары ултыртылды.

Көҙ көнө йыллыҡ пландан тыш тағы мең гектар ағас ултыртыласаҡ.

Станислав өлкәһенең урман хужалыҡтары яҙ көнө 9.198 гектар майҙанда ағас ултырттылар. 50 миллион төптән артыҡ һәр төрлө ағас ултыртылды. Алыҫ Көнсығыштан һәм Советтәр Союзының башҡа зоналарынан килтерелгән яңы төр ағастар Карпат климатына ҡулайлашып үҫәләр.

(ТАСС).

Украина ауылдарында

Совет Украинаһының ауылдарында ағымдағы йылда 200 мең яңы йорт һалына. Был, үҙған йылға ҡарағанда, 25 процентҡа артыҡ тиген һүҙ.

Хәҙерге көндә барлыҡ өлкәләрҙә һәр йәһәттән ҡулайлаштырылған, матур күренешле йорттар төҙөлә. Киләсәктә Украина ауылдары шул йорттар өлгөһөндә эшләнәсәк. Бөтә республика күләмендә 2,500 шундай йорт һалынасаҡ.

Төҙөү сезоны башланғандан алып, хәҙерге көнгә тиклем, Украина ауылдарында 100 клуб һәм уҡыу өйө, 20 больница һәм амбулатория, балалар йәсләһе — бөтәһе 426 йорт төҙөлдө лә инде.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Шверникҡа

Мәскәү

Председатель әфәнде,

Бөтә венгер халкы, минең үҙем кеүек үк, Советтәр Союзы Хөкүмәтенең киң күңелле карарын ысын күңелдән рәхмәт тойғоһо менән ҡаршыланы; был карары менән Советтәр Союзы Хөкүмәте репарацион йөкләмәләрҙе кәметеү тураһында Венгрия республикаһының үтенесен ҡәнәғәтләндерҙе. Венгрия республикаһының был үтенесе дуҫ булған Советтәр Союзына ҡарата ышаныс тойғоһо арҡаһында тыуҙы. Советтәр Союзы Хөкүмәте үҙенең киң күңелле карары менән беҙҙең йөкләмәләребеҙҙе шул тиклем кәметте, был инде беҙ өмөт иткәндән һәм беҙ көткәндән бөтөнләй ҙә артып китте.

Венгер халкы был киң күңелле карарҙа Советтәр Союзы халҡтарының һәм уның Хөкүмәте тарафынан үҙенә ҡарата яҡшы теләкте булыуын һәм дуҫтарса ярҙамды яңы иҫбат ителеүен күрә. Һеҙ был, бер үк ваҡытта, хужалыҡты аяҡҡа баҫтырыу эшенә үҙенең бөтә көсөн биреүсе венгер хеҙмәтсәндәренең ныҡышмалы эштәрен дәртләндереүсе булып тора.

Венгер халкының һәм шулай уҡ үҙемдең ысын күңелдән рәхмәтебеҙҙе тапшырып, мин, Председатель әфәнде, Һеҙгә һәм Һеҙҙең йөҙөгөҙҙә Советтәр Союзы халҡтарына, венгер халҡы үҙ тыуған иленең демократик нигеҙҙә үҫеүенә ... һәм рәхмәт тойғоһо менән Советтәр Союзына ҡарата дуҫлыҡ һәм ... демократик иҫке ... беҙҙең ... Советтәр Союзына тоғро ҡаласаҡ.

Тильди Золтан,
Венгрия республикаһының Президенте.

Министрҙар Советы Председателе Генералиссимус Сталинға

Мәскәү

Председатель әфәнде,

Репарацион түләүҙәрҙең ҡалған суммаһын яртылай ҡыҫҡартыу тураһында Советтәр Союзы Хөкүмәтенең киң күңелле карары өсөн Венгрия хөкүмәте исеменән ысын күңелдән рәхмәт тойғоһо менән ҡаршыланы.

Венгер халкы был карарҙа Советтәр Союзы Хөкүмәтенең ... Советтәр Союзының венгер халҡына ... ярҙамын күрҙе; Советтәр Союзы үҙенең ... был ярҙам ... венгер халҡына ... етеү ...

Венгрия халҡ демократияһын төҙөү Советтәр Союзы Хөкүмәтенең дуҫтарса ярҙам саралары өсөн иңгә булып торғанлыҡты Венгер халҡы өсөн аңлайбыҙ. ... Советтәр Союзы һәм Венгрия араһындағы дуҫлыҡты артабан тәрәнәйтеүгә ... аңлап, ул халҡ демократияһының ныҡлығы өсөн ... эшләйәсәк.

Был киң күңелле ҡарарығыҙ өсөн, Председатель әфәнде, Һеҙгә Венгрия хөкүмәте исеменән һәм үҙемдең исемемдән ысын күңелдән тәрән рәхмәтемде ҡабул итеп алығыҙ.

Репарацияларҙың ҡалған суммаһын кәметеү Венгрияның экономик көстәрен тағы ла тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыуға һәм үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк.

Диньеш Лайош,
Министрҙар Советы Председателе.

Генералиссимус СТАЛИНҒӘ

Мәскәү, Кремль

Ҡалған репарацион сумманың яртыһын кәметеү тураһында Һеҙҙең киң күңелле ҡарарығыҙ өсөн минең ысын күңелдән рәхмәт белдереүемде ҡабул итегеҙ. Беҙ Венгрияның хеҙмәтсән халҡы интересәренән сығып, Һеҙгә мөрәжәғәт иткән ваҡытта үҙебеҙҙең үтенесебеҙҙең, быға тиклем дә һәр ваҡыт шулай була килгән кеүек үк, тәрән аңлау менән ҡаршы алынасағына ышандыҡ. Беҙ Һеҙҙең киң күңелле ҡарарығыҙға уның арҡаһында Венгрияны аяҡҡа баҫтырыу һәм хеҙмәтсән халҡтың тормош кимәлен күтәреү темпы тиҙләтеләсәге өсөн генә түгел, бәлки Венгрия халҡ демократияһы үҙен азат итеүсе ҡеүәтле Советтәр Союзы менән ғәҙел һәм дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре урынлаштыра алыуын таныуҙы күреп тә шатланабыҙ.

Беҙ был мөнәсәбәттәр артабан ла тәрәнерәк һәм ныҡыраҡ булһын өсөн бөтә нәмәне эшләйәсәкбеҙ.

Тәрән хөрмәт менән

М. И. Ракоши,
Будапешт, 8 июнь, 1948 йыл.

Советтәр Союзының Сит ил Эштәре Министре В. Молотов әфәндегә

Мәскәү

Ҡәҙерле Министр әфәнде!

Мин ысын күңелдән ҡәнәғәтләнеү һәм рәхмәт тойғоһо менән хатығыҙҙы алдым. Ул хатта Һеҙ Венгриянан тейешле булған репарацион түләүҙәрҙең ҡалған суммаһын ошо йылдың 1 июленән 50 процентҡа кәметеү тураһында Советтәр Союзы Хөкүмәтенең, киң күңеллелек күрһәтеп, ҡарар ҡабул итеүен белдерәһегеҙ.

Үҙенең дуҫына, Советтәр Союзына быға са ла ихтирамлы булған венгер халҡы был киң күңелле ҡарар тураһындағы хәбәрҙе ҙур рәхмәт белдереп ҡаршыланы. Был ҡарар, Венгрия демократияһын ныҡытыу һәм халҡтың тормош кимәлен күтәреү маҡсатын күҙҙә тотҡан эштәрҙең темпын көсәйтергә мөмкинлек бирә. Совет Хөкүмәтенең ҡарары Советтәр Союзы халҡтары менән венгер халҡы араһында быға са йәшәп килгән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен тағы ла ныҡыта. Венгр халҡы был мөнәсәбәттәрҙе үҙенең тышҡы политикаһының иң мөһим нигеҙе итеп иҫәпләй.

Министр әфәнде, минең ысын күңелдән хөрмәтләүемде ҡабул итегеҙ.

Мольнар Эрик.
Будапешт, 1948 йыл, 9 июнь.

Великие Лукиҙә виноград

Төньяҡ-көнбайыш шарттарҙа виноград үҫтереү быға са мөмкин түгел, тип иҫәпләнә ине. Великие-Луки өлкәһенең Жарковск районындағы ауыл хужалығы артелдәренең тәжрибәсе-колхозсылары был раҫлауҙы кире ҡаҡтылар.

Мичурин исемендәге колхоздың баҡсасыһы В. С. Милюшенко үҙенең усадьбаһы эргәһендәге участкаға бынан өс йыл элек бер нисә виноград ҡыуағы ултыртҡайны. Был виноград яңы тәбиғи шарттарҙа яҡшы үҫте һәм хәҙер емештәр бирә. Көҙ көнө иптәш Милюшенко 40 ҡыуаҡтан урожай кәтә. Баҡсаһы быйыл көнө 500 төп виноград ултыртты. Өлкәнең күп баҡсасылары виноград үрсетә башлаһылар.

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛЫ ТӨҘӨЛӨШӨНДӘ

☆ ☆ ☆

Көйөргәҙе колхозсылары Мәләүез районын ярышҡа саҡырҙылар

ЕРМОЛАЕВКА. (Телефон аша). 9 июнь көнө ине. Ҡулдарына көрәктәр, кәйләләр, ломдар тотҡан йөҙҙәрсә колхозсылар аттарға һәм автомашиналарға тейәлеп йыйналыу пункты булған «Пламя» колхозына ағылдылар. Йыр, гармон тауыштары яңғырап торҙо. Ылауҙар, автомашиналар лозунг һәм плакаттар менән биҙәлгән. Былар ҙур байрам төҫөн биреп торҙолар. Республикабыҙҙа яңы биш йыллыҡтың мөһим төҙөлөш объекттарынан береһе булған Ишембай — Ермолаевка тимер юл төҙөлөшөнә колхозсылар шулай ҙур күтәренкелек менән килделәр.

Йыйналыу пунктына килеүҙә Көйөргәҙе районының Таймаҫ, Отрада, Илтемәй ауыл Советтәрендәге колхоздарҙың колхозсылары айырыуса ойошҡанлыҡ күрһәттеләр. Бында ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә 2000-ләп колхозсы, йөҙҙән артыҡ ылау йыйналды. Яңы тимер юл төҙөлөшөндә бөйөк халҡ эшен башланыу хөрмәтенә пунктта митинг үткәрелде. Митингыла ҡатнашыусы колхозсылар үҙҙәренә бирелгән заданиене сроғынан 10 көн алда — 40 көн урынына 30 көн эсендә тамамларға йөкләмә алып, Мәләүез районы колхозсыларын ярышҡа саҡырҙылар һәм ҙур күтәренкелек менән эшкә юналделәр.

Төҙөүселәр участкала эшкә башланылар. Ләкин тәүге көндә юл төҙөлөшө управлениеһының ғәйебе менән ҙур ғына етешһеҙлектәр ҙә булды. Алдан билдәләнгән участка бирелмәүе арҡаһында байтаҡ ҡына эшсе көстәре файҙаһыҙ торорға мәжбүр булды. Быны юл төҙөлөшө управлениеһе һәм прораб участкалары ныҡ иҫәпкә алырға, артабан бындай хәлдәргә юл ҡуймаҫҡа тейештәр. Участкала эш тик икенсе көндә генә киң ҡолас менән йәйелдерелде.

Төҙөү эшен ҡыҙыулатыу маҡсатында төҙөүселәргә ярҙам итеү өсөн райондың етәксе ойошмалары инициативаһы менән 13 июндә, йәкшәмбе көндө Көйөргәҙе районы хеҙмәтсәндәре воскресник ойошторалар. Воскресникта 600-гә яҡын эшсе һәм хеҙмәткәр ҡатнашасаҡ. Бөгөн кис улар участкаға юлға сығалар.

Айлыҡ заданиене ун көндә тамамлау өсөн

Дәүләкән районы Ишембай—Ермолаевка тимер юлы трассаһын төҙөүгә 40 ат, 800 йәйәүле эшсе сығарырға тейеш. Район хеҙмәтсәндәре был заданиене арттырып үтәүгә ҡарар иттеләр. Юл төҙөлөшөнә аттар планда билдәләнгәнгә ҡарағанда биш тапҡыр, йәйәүле эшселәр ике тапҡырға артыҡ ебәрелә.

Юл төҙөүҙә ҡатнашыу сроғы бер ай итеп билдәләнгән. Дәүләкән районы колхозсылары заданиене ун көндә тамамлауға һүҙ бирҙеләр.

Ғ. Идрисов,
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Райондың күсмә Ҡыҙыл Байрағы булдырылды

ПЕТРОВСК. (Телефон аша). Район колхоздары ойошҡан рәүештә трассала эшкә киттеләр. Беҙгә бүленгән участка Ерғән ауылы янында. Бында тәүге ике көндә 300 йәйәүле эшсе һәм 80 ат килде.

Трассала эшләүселәрҙе хеҙмәтләндереү өсөн райондан ике медицина работнигы, бер ветврач һәм 18 агитатор ебәрелде. Агитаторҙар юл төҙөүселәр араһында ҡысҡырып газета уҡыуҙы ойошторалар, «боевой листоктар» сығаралар.

Участкала эшләүсе һәр бер колхозда ярыш таҡталары бар. Алдынғы колхоздарға биреү өсөн ВКП(б) район комитеты һәм район Советы исполкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы булдырылды.

М. Нәбиуллин,
ВКП(б)-ның Маҡар район комитеты секретары.

Ҡарлыман шәкәр заводында

Ҡарлыман шәкәр заводында төҙөлөш эштәре дауам итә. Заводтың төп корпусына фундамент һалыу тамамланды. Хәҙер тимер-бетон һалыу эштәре бара. Өфө—Ишембай тимер юлынан биш километр оҙонлоғонда тимер юл тармағы индерелгәндең һуңында төҙөлөш материалдары ташыу эше еңеләйҙе. Механик мастерской, складтар төҙөлдө. «ТЭЦ» төҙөлә. Егермешәр квартиралы ике дөйөм торлаҡ, 7 торлаҡ йорт, балалар баҡсаһы бинаһы, клуб, столовой, пекарня бинаһы эксплоатацияға тапшырылды.

Ағымдағы йылдың өсөнсө кварталында тағы ла дүрт торлаҡ йорт һалына, водопровод булдырыла. Төҙөлөш майҙанында Ауырғазы, Архангель, Бөзәйәз һәм Ҡырмыҫҡалы райондарынан килгән 433 кеше эшләй.

Берҙәм эш

Аксен машина-трактор станцияһы коллективы бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәү өсөн көрәшә. МТС Әлшәй районының 25 колхозын хеҙмәтләндерә. Яҙғы баҫыу эштәрен үткәреү ваҡытында колхоздар менән төҙөшкән договорҙы үтәү өсөн трактористәр тырышып эшләнеләр. Һөҙөмтәлә бөтә төр яҙғы эштәр планы 5 июнгә арттырылып үтәлде. Латипов, Әхмәтшин, Әхмәтьянов, Кравченко, Яхин иптәштәрҙең бригадалары айырыуса яҡшы эшләнеләр. Улар шартлы һәр бер тракторға 250—325-әр гектар ер эшкәрттеләр.

Хәҙер пар һөрөү эштәрен тамамлау өсөн көрәш бара. Комбайндарҙы ла урожай йыйнауға әҙерләү яҡшы бара. 21 комбайндың 15-енә ремонт теүәлләнде. Комбайнер Саламатин, Федотов иптәштәр машиналарын үҙҙәре хеҙмәтләндерә торған колхоздарға илтеп ҡуйҙылар.

Ғ. Саттаров.

Йәштәр бригадаларының уңыштары

Өфө паровоздар ремонтлау заводының арматур цехы коллективы сталинсы тимер юлсылар көнө хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫты һәм смена тәүлек заданиеһын кәмендә 200 процентҡа үтәргә йөкләмә алды.

Был йөкләмәне үтәүҙә комсомолец-йәштәр бригадалары өлгө күрһәтәләр. Цехтың токарный бүлегендә эшләүсе иптәш Марышев етәкселек иткән бригадаһы сменаға 2.5 норма бара. Бригада члендәре Е. Төмышев, Е. Чаплыков һәм бригадир үҙе бишәр йыллыҡ пландыы үтәнеләр. Айырым стахановсылар башҡаларҙы ла эшкә өйрәтәләр. Иптәш Никитин үҙ станогында Ефименконы токарлеқ эшенә өйрәтә. Иптәш Никитиндән эшкә өйрәнгән 12 кеше хәҙер заводтың алдынғы токарҙарынан һаналалар. Комсомолец-токарь иптәш Тепкин заводҡа яңы килгән Сергеев һәм Григорьевтарҙы токарлек профессияһына өйрәтергә йөкләмә алды.

Партия тормошо

Партия ойошмаһы производство планын үтәү өсөн көрәш ойоштороусы

«Туймазынефть» тресы үҙәк электр станцияһының партия ойошмаһы (секретаре иптәш Леньшин) үҙенең бөтә партия-политик эшен биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү маҡсатына йрашлы итеп ойошторған. — Ҡайҙа ғына эшләһәң дә, ниндәй генә эште башҡарһаң да, һин биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн бөтә халыҡ көрәшендә актив рәүештә ҡатнашырға тейешһең!

Партия ойошмаһы һәр бер эшсене бына ошо рухта тәрбиәләй. Энергетиктәр алдында нефть промыслоларының өҙлекһеҙ эшләүе һәм Октябрьск ҡалаһының төҙөлөштәре өсөн күпме кәрәк булһа, шул тиклем электр энергияһы биреү бурысы тора. Улар, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү эшендә үҙҙәренең алдында торған был яуаплы бурысты аңлап, ырамлы эшләү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерҙеләр.

Партия ойошмаһы үҙенең бөтә эшен социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүҙе тәьмин итеүгә йүнәлдерҙе. Коммунистәр эштең яуаплы участкаларына урынлаштырылды. Ойошмалағы 40 коммунистең 34-е туранан-тура производствола эшләй. Уларҙан 23 кеше стахановсылар. Коммунист-слесарь Нәбиуллин көндәлек эш нормаһын систематик рәүештә 200—250 процентҡа еткереп үтәй. Күптән түгел Ленин ордене менән наградланған коммунист иптәш Лисичкин етәкселек иткән турбина цехы ай һайын планды арттырып үтәп килә.

Партия ойошмаһы коммунистәрҙең авангардлыҡ ролен һәм общественный-политик тормошта активлыҡтарын күтәреүгә бик ныҡ иғтибар бирә. Быныҡ өсөн коммунистәрҙең дөйөм йыйылыштары регуляр рәүештә үткәрелә. Уларҙа производство мәсьәләләре һәм партияның эске эштәренең мөһим мәсьәләләре тикшерелә. 1948 йылда булып үткән йыйылыштарҙа «Производствола хеҙмәтте ойоштороу», «Дотацияһыҙ эшләү тураһында Мәскәүҙәге 9 завод директорҙарының мөрәжәғәте», «Рационализаторлыҡ тәҡдимдәре һәм уйлап сығарыуҙар тураһында», «Партияның ҡала һәм өлкә конференцияларының ҡарарҙары һәм партия ойошмаһының бурыстары» тигән мәсьәләләр тикшерелде. Шул арҡала производствоға коммунистәрҙең йоғонтоһо көсәйҙе. Партия ойошмаһының коллективте социалистик ярыш йөкләмәләрен үтәүгә ойоштора алыуы матур һөҙөмтәләр бирә. I квартал планы арттырып үтәлде. Апрель-май айҙарында план үтәлеше 121—125 процентҡа етте. Электр энергияһы эшләп сығарыуҙың үҙенә төшеү хаҡы план менән билдәләнгәнгә ҡарағанда 9 процентҡа кәмене. Хеҙмәт етештереүсәнлеге 15 процентҡа күтәрелде.

Шулар менән бер рәттән энергетиктәр алдында тағы ла ҙурыраҡ бурыстар тора әле. Ҡала үҫә, нефть промыслолары арта бара. Был хәл электр энергияһын күберәк биреүҙе талап итә. Партия ойошмаһы электр станцияһының энергетик ҡеүәтен арттырыу, эске резервтарҙы киңерәк файҙаланыу кеүек мөһим мәсьәләләр менән тағы ла тәрәнерәк шөғөлләнергә тейеш. Эшселәр араһында политик-массовый эштең кимәлен күтәрергә кәрәк. Былар бөтәһе лә ярыш йөкләмәләренең үтәлешен тәьмин итеү өсөн мөһим шарт булып тора.

С. Федотов.

Йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшәбеҙ

Беҙҙең колхоздың членлары быйыл 321 гектар бойҙайҙың һәм 189 гектар арыштың һәр бер гектарынан 108-әр бот урожай үҫтереп алыуҙы үҙ алдарына төп бурыс итеп ҡуйҙылар. Партия ойошмаһы был яуаплы йөкләмәләрҙе үтәүҙә колхозсыларға бөтә яҡлап ярҙам итә. Партия-политик һәм ойоштороу-массовый эштәр бына ошо маҡсатҡа йүнәлдерелде.

Сәсеү алдынан коммунистәр баҫыу эшенең иң яуаплы участкаларына урынлаштырылды. Коммунистәрҙән Ислам Әхмәдуллин, Нурмый Фатҡуллин иптәштәр сәсеү машинаһында эшләп, гүзәл өлгө күрһәттеләр. Улар көнөнә алтышар гектар ашлыҡ сәстеләр, шулай итеп, үҙҙәренең шәхси өлгөләре менән колхозсыларҙы хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүгә саҡырҙылар.

Агитаторҙар баҫыуҙа систематик рәүештә политик-массовый эш алып барҙылар. Юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү, ордендәр һәм медалдәр менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указын, Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хатын һәр бер колхозсыға ентекләп төшөндерҙек. Бынан тыш, халыҡ-ара хәл һәм илебеҙҙәге көндәлек яңылыҡтар тураһында беседалар үткәрелде.

Массовый-политик эште юғары урожай өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереүгә йүнәлтеү арҡаһында колхоз яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәрҙе. Юғары урожай өсөн көрәш дауам итә. Партия ойошмаһы сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшен үҙенең ныҡлы контроле аҫтына алды. Хәҙер 100 гектарға яҡын ашлыҡ утаҡды.

Ш. Фазлиәхмәтов,

Дәүләкән районы, Каганович исемендәге колхоз партия ойошмаһының секретаре.

Яңы китаптар

Башсоюздың культбазаһы Татгосиздат тарафынан баҫылып сығарылған балалар әҙәбиәтен һәм художестволы әҫәрҙәрен алды. Был алынған әҙәбиәт, ошо көндәрҙә, республикабыҙҙың район потребсоюздарына оҙатыласаҡ.

Китаптар араһында халыҡ шағире **Мәжит Ғафуриҙең** «Шиғырҙар һәм мәсәлдәр» йыйынтығы бар. Ул 5.000 дана тираж менән сығарылған. Хаҡы 3 һум 50 тин.

Был китапта шағирҙең мәктәптә уҡыусыларға ҡарата яҙылған гүзәл әҫәрҙәре бар. Мәҫәлән;

«Ҡайсағында әллә кемде
ҡыҙғаналар,
Уфылдашып аҡрын ғына
ҡуҙғалалар.
Ахырыһы был китап күңеллелер,
Күҙ ҙә алмай уҡый уны был
балалар».

—тигән һүҙҙәр менән халыҡ шағире үҙенең китабындағы, тәрән серле, ҡаңаштәренә ҡыҙыҡһындырыу менән башлап китә.

Башҡорт халҡының бөйөк шағире йәш үҫмерҙәрҙе уҡырға, китап өҫтөндә эшләргә, дәресте күңел биреп әҙерләргә өндәй, һәм артҡа ҡалған иптәштәренә ярҙам итергә саҡыра.

Китап төрлө һүрәттәргә бик бай һәм типографик эшләнеше лә бик матур.

Әхмәт Ерикәй. «Гөрләһен беҙҙең йыр». Тиражы 5.000, хаҡы 6 һум. Автор был китапта совет йәш үҫмерҙәренең шат күңелле, төрлө һөнәргә өйрәнеү һәләтлектәрен һәм, улар алдында быға өлгәшеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе күрһәтеү менән бергә, беҙҙең балаларыбыҙҙың яҡын дуҫы иптәш Сталин күргән хәстәрлеген асыҡ яҡтырта.

Шауларын, гөрләһен беҙҙең йыр,
Алыҫҡа яңғыраһын беҙҙең йыр.
Күктәргә күкрәһен беҙҙең йыр,
Беҙгә йыр, беҙгә бирҙе Сталин,
Йәшә, дан Сталин!..

М. Пришвин. «Ҡояш хазинаһы». Тиражы 10.165. Хаҡы 2 һум 50 тин.

М. Горький. «Дауыл хәбәрсеһе». Тиражы 10.165, Хаҡы 1 һум 10 тин.

Мәктәпкәсә йәштәге балалар өсөн китаптар

Ҡаун Нәжми. «Яңы йортта». Тиражы 20.000. Хаҡы 1 һум.

Ғ. Бакир. «Ҡар йорт». Тиражы 20 мең, Хаҡы 1 һум.

В. Гаршин. «Ил гиҙеүсе әрмәнде». Тиражы 10.000. Хаҡы 5 һум.

Шарль Перро. «Ҡыҙыл ҡалпаҡ». Тиражы 10.000. Хаҡы 1 һум.

Художестволы әҙәбиәт

Жамбул шиғырҙары. Ә. Исхаҡ тәржемәһендә. Тиражы 5.165. Хаҡы 8 һум.

Афзал Шамов. «Һайланма хикәйәләр». Был йыйынтыҡҡа автордың «Миңнур ҡарт», «Рәүфә», «Бер мөхәббәт тураһында», «Түйҙә», «Эсә» һәм башҡа күп кенә шиғырҙары урынлаштырылған. Тиражы 10.000. Хаҡы 20 һум.

Иван Франко. «Хикәйәләр» Ғ. Башир тәржемәһендә. Тиражы 5.165. Хаҡы 7 һум.

Генеральный Ассамблеяның һуғыш пропагандалауға ҡаршы саралар тураһындағы ҡарарҙарын боҙоу

Берләшкән милләттәр ойошмаһы Генеральный Ассамблеяһының икенсе сессияһы үткәргән «яңы һуғыш пропагандалаусыларға ҡаршы көрәшергә тейешле саралар тураһында» сығарылған ҡарарҙы һәм Берләшкән милләттәр ойошмаһының бөтә членлары тарафынан ҡабул ителгән резолюцияға ҡарамаҫтан, Америка Ҡушма Штаттарында котороноҡо һуғыш пропагандаһы алып барыла. Ҡушма Штаттарҙың стратегик һауа көстәре командующие генерал Кеннизен күптән түгел яһаған агрессив сығышы айҡанлы Америка журналы «Ньюс Уик»-та ошо йылдың 17 майында сыҡҡан мәҡәлә был пропаганданың ап-асыҡ миҫалы булып тора. Ошо айҡанлы Советтар Союзының АҠШ-тағы посольствоһы 9 июндә АҠШ хөкүмәтенә түбәндәге йөкмәткеле нота ебәрҙе:

«Ҡушма Штаттарҙың стратегик һауа көстәре командующие генерал Кеннизен Бангорҙа (Мэн штаты) ошо йылдың 7 майында яһаған сығышы тураһында «Ньюс Уик» журналына ошо йылдың 17 майында мәҡәлә урынлаштырылған; унда Совет Союзы адресына ҡарата ялған ялалар бар; был ялалар Советтар Союзын, йәнәһе, Ҡушма Штаттарға һөжүм итергә әҙерләнә тип күрһәтәләр. Был мәҡәләлә шулай уҡ, Советтар Союзына ҡарата, атап айтҡанда, Мәскәү, Ленинград, Киев, Харьков, Одесса кеүек һәм башҡа совет ҡалаларын емереү өсөн Американың һауа көстәрен, авиацион базаларын һәм атом бомбаларын файҙаланыу планы тураһында ентекләп яҙыла. Америка самолеттарының атом бомбалары менән СССР-ға һөжүм итеү пландары тураһында һөйләп, «Ньюс Уик» журналы былай тип белдерә: «Уларҙың маҡсаттарынан берәүһе — бигерәк тә Мәскәү. Унан һуң Российның Европа өлөшөндәге башҡа ҡалалары — Киев, Ленинград, Харьков һәм Одесса». Унан ары мәҡәлә Америка стратегтәре «Россия тирәләй һауа базаларының яйык [illegible]» төҙөү, «был [illegible]» проект тураһында, тип әйтелә. «Ньюс Уик» журналында һөйләнгән был план [illegible] яҡын урынлаштырылған Америка базаларынан һауа, диңгеҙ һәм ҡоро ер операцияларын комбинациялауҙы һәм уларҙы идара итеп торған снарядтар менән интенсив бомбардировкалау һәм атакалау өсөн файҙаланыуҙы ҡуҙаҙ тота.

Совет Союзына ҡаршы котороноҡо рәүештә яңы һуғыш пропагандалау актлары 1947 йылдың 3 ноябрендә Генеральный Ассамблеяның икенсе сессияһы резолюцияһын тупаҫ рәүештә боҙоу булып тора, унда былай тип әйтелә:

«Генеральный Ассамблея

1. Теләһә ниндәй илдә алып барылған тыныслыҡҡа ҡурҡыныс тыуҙырырға һәләтле, йәки уны көсәйтеүсе пропаганда, тыныслыҡты боҙоу һәм агрессия акты маҡсатын тотҡан теләһә ниндәй пропаганда формаһын ғәйепләй.

2. Берләшкән милләттәр ойошмаһының членлары булып торған бөтә илдәрҙең хөкүмәттәренә:

а) Үҙ ҡарамаҡтарында булған информация һәм пропаганданың барлыҡ юлдары менән устав маҡсаттары һәм принциптәре нигеҙендә государстволар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә булышлыҡ итеү өсөн,

б) бөтә халыҡтарҙың һис шикһеҙ тыныслыҡ теләүҙәрен белдереү өсөн билдәләнгән бөтә информацияларҙы дәртләндереү өсөн, үҙҙәренең төп закондары тарафынан юл ҡуйыла торған тейешле аҙымдарҙы ҡабул итергә тәҡдим итә».

Вәкилдәре Генеральный Ассамблеяның икенсе сессияһында был резолюцияны яҡлап тауыш биргән хөкүмәттәр, үҙ ҡарамаҡтарында булған бөтә юлдар менән устав маҡсаттары һәм принциптәре нигеҙендә государстволар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә булышлыҡ итергә тейештәр. Был резолюцияны ҡабул иткән хөкүмәттәр, шулай уҡ, үҙ территорияларында булған һуғыш пропагандаһын булдырмау, был резолюцияға ҡапма-ҡаршы булған харәкәттәр өсөн яуап бирергә тейештәр.

Совет Хөкүмәте «Ньюс Уик» журналында юғарыла күрһәтелгән мәҡәләгә Америка Ҡушма Штаттары хөкүмәтенең иғтибарын [illegible] шундай мәҡәләләрҙең баҫылып сығыуы Берләшкән милләттәр ойошмаһы членлары булып торған государстволар тарафынан, шул иҫәптән, Америка Ҡушма Штаттары тарафынан да бертауыштан ҡабул ителгән, әле күрһәтелгән һуғыш пропагандаһына ҡаршы резолюцияға ҡапма-ҡаршы тора.

Совет Хөкүмәте был нотаның күсермәһен бер үк ваҡытта Берләшкән милләттәр ойошмаһының Генеральный секретаре Трюгве Ли әфәндегә ебәрә». (ТАСС).

Голландияла котороноҡо рәүештә яңы һуғышты пропагандалау

Һуңғы ваҡытта Голландияла котороноҡо рәүештә яңы һуғышты пропагандалау бара. Шуға бәйләнешле рәүештә, Совет Хөкүмәтенең ҡушыуы буйынса, СССР-ҙың Голландиялағы посолы 9 июндә Голландия хөкүмәтенә түбәндәге йөкмәткеле нотаһын тапшырҙы:

«Совет Хөкүмәтенә билдәле булғанынса, Голландияның хеҙмәт партияһы газетаһы «Хет Фрейе Фольк» ошо йылдың 13 апрелендә «Рус стратегияһы һәм уға яуап» тигән баш менән мәҡәлә баҫып сығарҙы. Был мәҡәләлә, Советтар Союзына ҡарата, имеш, ул башҡа хөкүмәттәрҙең иминселегенә ҡурҡыныс тыуҙыра, тигән ялғандар тул-тулы, һәм Советтар Союзына ҡаршы һуғыш асыу маҡсатындағы сараларҙы тормошҡа ашырыуға саҡырыуҙар бар. «Хет Фрейе Фольк» газетаһы үҙенең уҡыусыларын Советтар Союзы һәм уның политикаһы тураһында уйлап сығарылған ялғандар менән ҡурҡытырға, СССР-ға дошманлыҡты һәм уны күрә алмаусылыҡты тоҡандырырға тырыша, СССР-ҙың промышленный үҙәктәренә атом бомбаларын ташларға саҡыра. «Хет Фрейе Фольк» газетаһында «Хәҙерге көндә тик Америкала ғына булған атом бомбаһы, һуғыш башында уҡ Баку, Магнитогорск, Мәскәү, Ленинград... ҡалаларына ташланасаҡ» тип туранан-тура яҙыла.

Совет Хөкүмәте, бигерәк тә «Хет Фрейе Фольк» газетаһы Голландия хөкүмәтендә етәксе урын тотҡан партия органы газетаһы булғанлыҡтан, был провокацион һөтәшлеүҙәрҙе иғлан итеүҙе ситләтеп китә алмай.

Ошо айҡанлы Совет Хөкүмәте юғарыла хәтергә алынған «Хет Фрейе Фольк» газетаһындағы кеүек, һуғышты асыҡтан-асыҡ пропагандалаусы мәҡәләләрҙең баҫылып сығарылыуы Генеральный Ассамблеяның 1947 йыл 3 ноябрҙә ҡабул иткән билгеле ҡарарына ҡапма-ҡаршы килә икәнлегенә Голландия хөкүмәтенең иғтибарын йүнәлтеүҙе кәрәк тип һанай, ул ҡарарҙа:

«Генеральный Ассамблея

1. Теләһә ниндәй илдә алып барылған, тыныслыҡҡа ҡурҡыныс тыуҙырырға һәләтле, йәки уны көсәйтеүсе пропаганда, тыныслыҡты боҙоу һәм агрессия акты маҡсатын тотҡан теләһә ниндәй пропаганда формаһын ғәйепләй.

2. Берләшкән милләттәр ойошмаһының членлары булып торған бөтә илдәрҙең хөкүмәттәренә:

а) Үҙ ҡарамаҡтарында булған информация һәм пропаганданың барлыҡ юлдары менән устав маҡсаттары һәм принциптәре нигеҙендә государстволар араһында дуҫлыҡ мөнәсәбәттәренә булышлыҡ итеү өсөн,

б) бөтә халыҡтарҙың һис шикһеҙ тыныслыҡ теләүҙәрен белдереү өсөн билдәләнгән бөтә информацияларҙы дәртләндереү өсөн, үҙҙәренең төп закондары тарафынан юл ҡуйыла торған тейешле аҙымдарҙы ҡабул итергә тәҡдим итә».

Билдәле булғанынса, һуғышты пропагандалауҙы ғәйепләүсе был резолюция Берләшкән милләттәр членларының бөтә хөкүмәттәре тарафынан һәм, шул уҡ иҫәптән, Голландия хөкүмәте тарафынан, бер күңелдән ҡабул ителгәйне. Шулай итеп, Генеральный Ассамблея тарафынан ғәйепләнгән, Голландия матбуғатында баҫылып сыҡҡан, һуғышты пропагандалаусы мәҡәлә Голландия хөкүмәтенең резолюцияны ҡабул иткәндәге үҙ өҫтөнә алған бурыстарҙы боҙоуы булып тора.

Был, Совет Хөкүмәтенең нотаһының күсермәһе, бер үк ваҡытта, Берләшкән милләттәр ойошмаһының Генеральный секретаре Трюгве Ли әфәндегә ебәрелә». (ТАСС).

Илде электрләштереүҙә Ленин—Сталин идеяларының бөйөк тантанаһы

1920 йыл. Совет Россияһы — эшселәр менән хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙең тыуғандаш союзы Колчак һәм Деникин бандаларын тар-мар итте. Илебеҙ ваҡытлыса тыныслыҡҡа өлгәште. Коммунистәр партияһы хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнергә мөмкинлек алды.

Бөйөк Ленин—Сталин партияһының туғыҙынсы съезы (1920 йылдың мартында) Совет государствоһы алдында торған хужалыҡ бурыстары тураһында тикшерҙе. Бигерәк тә берҙәм хужалыҡ планын төҙөү айырыуса әһәмиәтле мәсьәлә булды. Был тарихи планда Владимир Ильич Ленин тарафынан «10—20 йылға бөйөк программа» тип аталған мәсьәлә —илдең халыҡ хужалығын электрләштереү эше төп урынды алды. Бына шул нигеҙҙә ленинсе ГОЭЛРО (Россияны электрләштереү буйынса государство комиссияһы) планы эшләнде. Ул бөтә Россия Советтәренең 8-се съезында раҫланды.

ГОЭЛРО планын Владимир Ильич беҙҙең партиябыҙҙың икенсе программаһы итеп баһаланы: Социалистик революцияның даһи Ленин Совет власе нигеҙендә илде электрләштереү аша коммунизмға барыу юлын асыҡ күрҙе һәм ул «Совет власе плюс илде электрләштереү — коммунизм» ул тине. Лениндең тоғро соратнигы иптәш Сталин 1921 йылда ГОЭЛРО планы — совет хужалығының үҫеүендә берҙән-бер мөһим һәм реаль сара, социализмға барыу юлында берҙән-бер дөрөҫ план икәнлеген иҫбат итте. Сөнки ул планда илебеҙҙең халыҡ хужалығында беренсе бөтә донъя һуғышына тиклем булған кимәлдә уҙып китеү бурысы ҡуйылды. Илде электрләштереү нигеҙендә промышленность производство кимәле, 1913 йыл менән сағыштырғанда, икеләтә артырға, шулай уҡ транспортта йөк йөрөтеү һәләтлеге лә ике тапҡырға үҫергә тейеш ине. Бының өсөн илебеҙҙә унарлаған һанда көслө электр станциялары төҙөү төп маҡсат итеп ҡуйылды һәм был бөйөк бурыс әҙма-эҙ ғәмәлгә ашырыла килде.

Халыҡ хужалығында Ленин — Сталин идеялары еңде. Партиябыҙға ҡаршы булған «демократик централизм» группаһының — Сапронов, Осинский һәм В. Смирнов шайкаһының, уларҙы ысын күңелдән яҡлаусы Рыков һәм Томский кеүек халыҡ дошмандарының ынтылышы ысынбарлыҡта селпәрәмә килтерелде. Илебеҙҙең төрлө мөйөштәрендә Ильич лампалары нуры балҡыны. Промышленность предприятиеләренең, транспорттың производство ҡеүәте көсәйҙе, хеҙмәт етештереүсәнлеге беренсе бөтә донъя һуғышына тиклем булған кимәлдә уҙып китте. Владимир Ильичтең 10—20 йылға иҫәпләнгән бөйөк программаһы срогынан алда өлгәлә итеп үтәлде.

Ләкин коммунистәр партияһы, Совет Хөкүмәте һәм бөтә совет халҡы өлгәшелгәндәр менән тынысланманы, Ленин өйрәткән юлдан Сталин етәкселегендә алға атланы. Совет илендә социализм төҙөү буйынса сталинсе биш йыллыҡтар осоро башланды һәм ул биш йыллыҡтар Сталин етәкселегендә гүзәл уңыштар килтерҙе. Сталинсе биш йыллыҡтарҙың тарихи әмеше 1941—1945 йылдарҙа айырыуса яҡшы һөҙөмтәләр күрһәтте. Был гүзәл еңеүҙәр немец-фашистик илбаҫарҙарын һәм япон империалистәрен тар-мар итеүҙе тәьмин итте. Империализм лагеренән бер нисә ил демократизм лагеренә сыҡты. Хәҙер халыҡ демократияһы илдәренең хеҙмәтсәндәре үҙ илдәренең халыҡ хужалығын совет системаһы өлгөһөндә, совет халҡының туғандарса ярҙамы менән Ленин планы принцибендә төҙәйҙәр, уны социализмға табан ҡарап алға алып баралар.

Икенсе бөтә донъя һуғышынан һуң Совет государствоһы «1946—1950 йылдарҙа СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең биш йыллыҡ планы тураһында закон» сығарҙы. Был законда совет халҡының теләге, Ленин—Сталин партияһының нәге идеялары кәүҙәләнгән.

Сталинсе дүртенсе биш йыллыҡ планда илебеҙҙе артабан электрификациялау эше ғәйәт ҙур урын алды һәм Бөйөк Советтар Союзын электрификациялауҙың яңы программаһы билдәләнде. 1950 йылда электр энергияһын эшләп сығарыуҙы, 1940 йылдарға ҡарағанда, 70 процентҡа арттырыу бурысы ҡуйылды. Биш йыл эсендә СССР-ҙың барлыҡ электр станцияларында 11,7 миллион киловатт энергия эшкә ҡушылырға тейеш һәм 1950 йылда СССР электр станцияларының билдәләнгән ҡеүәтен 22,4 миллион киловатҡа еткереү мөһим бурыстарҙың береһе булып тора. Биш йыл аҙағында дөйөм ҡеүәтә ике миллион 300 мең киловатт булған гидроэлектр станциялары эшкә башлаясаҡ һәм улар донъяға бөйөк Лениндең идеяларын тағы ла көслөрәк балҡытасаҡтар.

Социалистик промышленносте тағы ла ҡеүәтлерәк электрләштереү менән бер рәттән, тимер юл транспортын һәм ауыл хужалығын артабан да киңерәк электрләштереүгә күселә. «Ауыл хужалығында ҙур булмаған гидроэлектр станциялары — ел көсө, йылылыҡ көсө менән эшләүсе электр станциялар һәм локомобилдәр, шулай уҡ газогенераторҙар массовый рәүештә төҙөүҙе тәьмин итергә» тип закон менән ныҡытылды.

Совет халыҡ хужалығының электр станцияларында өр яңы энергетик техника—юғары баҫымлы парҙы һәм юғары температураны файҙаланыуҙы, өр яңы теплофикация турбиналарын файҙаланыуҙы һәм яңы төр ҡаҙандар, генераторҙар, юғары вольтле аппаратураларҙы файҙаланыу бөтә киңлеге менән ғәмәлгә ашырыла. Социализм иленең бөтә урындарында электр станцияларының һәм электр селтәрҙәренең производство процестарен автоматлаштырыу эштәре бик киң йәйелдерелә. Беренсе наүбәттә гидроэлектр станцияларының эштәре тулыһынса автоматлаштырылалар. Бөтә был практик саралар менән бер рәттән, юғары көслө даими тоҡты алыҫ араларға ебәреү буйынса фәнни экспериментал эштәр башҡарыла һәм улар практик тормошҡа ашырыла килә.

Элек, батша Россияһы ваҡытында үлеп бөтәргә дусар ителгән башҡорт халҡы тормошонда ла илебеҙҙе электрификациялау буйынса Ленин—Сталин идеяларының бөйөк тантанаһын асыҡ күреп була. Мәҫәлән, тик 1947 йылда ғына Башҡортостан колхозларында 10 гидроэлектр станция һәм 16 теплоэлектр станция төҙөлдө, йөҙәрләгән колхозсының йорттарына, һәм унарлаған колхоз канцелярияларына, мәктәптәргә, клубтарға, ҡыҙыл мөйөштәргә Ильич лампаларының нуры балҡыны. Хәҙерге көндә Башҡортостанда 27 урында яңы электростанциялар төҙөлөп ята.

Шуның менән бер рәттән 33 колхоз, 14 МТС, ике совхоз, дүрт район үҙәге хеҙмәтсәндәре, ике мәктәп һәм инкубатор станцияһы яҡындағы ҡалаларҙан һәм промышленность предприятиеләренән энергия һәм яҡтылыҡ алалар. Тик һуңғы бер йыл ваҡыт эсендә генә колхоздарҙа һәм МТС-тарҙа 6 меңгә яҡын электр лампалары яҡтылыҡ бирҙеләр. 157 электр моторҙары, 96 урында электр көсө менән эшләүсе молотилкалар, тирмәндәр, таҡта ярыу мастерскойҙары урынлаштырылды һәм йыһазландырылды. 109 километр оҙонлоғонда юғары волтле һәм 132 километр оҙонлоғонда түбән волтле линиялар үткәрелде. Колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа бындай эш киңәйгәндән-киңәйә бара.

Ә Башҡортостандың ҡалаларында яңынан-яңы электр станциялары барлыҡҡа килә. Бынан 18 йыл элек ҡырлыҡ һәм әрем үҫкән ҡола яланда Черниковск ҡалаһы үҫеп сыҡты. Уның уңлаған ҙур һәм көслө электр станциялары халыҡ бәхете, шатлығы өсөн хеҙмәт итәләр. Уның машиналар төҙөүсе, нефть эшкәртеүсе һәм башҡа заводтары электр энергияһы менән Совет Башҡортостаны халҡына ғорурлыҡ һәм шатлыҡ килтерә.

Бындай миҫалдар бик күп. Улар илебеҙҙең бөтә мөйөштәрендә бар. Был миҫалдарҙа бөйөк Ленин — Сталиндең коммунизм идеялары кәүҙәләнгән. Илебеҙҙең бөтә мөйөштәрендә коммунизм нуры балҡый. Сөнки беҙ бөтә юлдар коммунизмға алып барған осорҙа йәшәйбеҙ һәм коммунистик обществоны үҙ ҡулыбыҙ менән төҙөйбөҙ.

Бөтә халыҡ хәҙер сталинсе дүртенсе биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү тойғоһо менән рухланған. Халыҡ хужалығының барлыҡ тармаҡтарында ла хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан юғары күтәреү, продукцияның үҙенә төшөү ҡиммәтен кәметеү өсөн социалистик ярыш киң ҡолас йәйҙе. Был патриотик эшкә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә ҡушылдылар һәм һөйөклө юлбашсыбыҙ Иосиф Виссарионович Сталинға яҙған хаттарында ҙур яуаплы һәм маҡтаулы йөкләмәләр алдылар. Быны уңышлы үтәүҙә электрификация ҙур роль тота.

Партияның урындағы ойошмалары, район һәм ауыл Советтарының исполкомдары ауыл ерҙәрендә төҙөлөп ятҡан станцияларҙы тиҙерәк эшкә ҡушыу өсөн һәм яңыларын төҙөү өсөн ижади инициатива күрһәтергә бурыслылар. Халыҡ хужалығын электрләштереү эше нигеҙлем киң ҡолас алһа, коммунизм төҙөү эше лә шул тиклем тиҙләтелә.

Ғ. Ғаффан.

Совет төҙөлөшө

Совет аппаратының аныҡ һәм оператив эшләүенә өлгәшергә

Сал сәсле кеше, район Совете башҡарма комитете председателенең ҡабул итеү бүлмәһенең ишек төбөндә нәүбәт көтөп, оҙаҡ ултырҙы. Ахырҙа, түҙемлеге бөтөп, секретарға мөрәжәғәт итте:

— Председателдең ҡабул итеүен көтәм. Йомош менән килеүселәрҙең иң генә тороп ҡалдым. Әйтегеҙ әле, биш кенә минутҡа ҡабул итһен.

— Һеҙ Яков Михайлович Салодовников булаһығыҙмы?

— Эйе, Салодовников.

— Хәҙер председатель ҡабул итә алмай. Ул бушамай. Мөһимерәк эштәре бар.

— Хәҙер ес көн инде мин уның ишек төбөн һаҡлайым. Нинә мине ҡабул итмәй ул.

— Ныҡышмағыҙ, мин бер нәмә лә эшләй алмайым. Бойороҡ шундай.

Салодовников, түҙемлеге бөтөп урынынан торҙо һәм председателдең ишеген асып:

— Инергә рөхсәт итегеҙ,—тине.

— Интекһегеҙ бит инде, һөйләгеҙ!

— Мин һаман да квартираһыҙ йөрөйөм. Хәҙер икенсе йыл бит инде.

— Бөгөн үтә мохтаждар исемлегенә яҙып ҡуйырға ҡушырмын. Башҡаса килеп, мине борсоп йөрөмәгеҙ.

Капитан Салодовников 1946 йылдың майында Совет Армияһы сафынан демобилизацияланып ҡайтты. Ул һуғышҡа тиклем торған квартира икенсе кешегә бирелгәйне. Закон нигеҙендә квартира иптәш Салодовниковҡа һис һүҙһеҙ кире ҡайтарылырға тейеш. Ләкин Киров район Совете башҡарма комитете быны эшләмәне. Иптәш Салодовников үҙенең квартираһын кире ҡайтарыуҙы һорап биргән ғаризаһына биш айҙан һуң ғына яуап алды. Унда «квартирағыҙҙы кире ҡайтара алмайбыҙ, хәҙергә буш квартира юҡ, булыу менән торлаҡ бирелер», тип әйтелгәйне. Иптәш Салодовников закондың талабының ҡәнәғәтләндерелеүен һорап, Киров районы прокурорына мөрәжәғәт итте. Прокурор Назин: «закон менән билдәләнгән алты ай срок үткән. Шул сәбәпле һеҙҙең талабығыҙ ҡәнәғәтләндерелмәй» тип яуап бирҙе.

Бына ике йыл инде иптәш Салодовников ҡала Советенән Киров район Советына, унан торлаҡ управлениеһына йөрөй. Ләкин уға квартира бирелгәне юҡ әле. «Үтә мохтаждар» исемлегенә индерелгәндән һуң да 8 ай ваҡыт үтте.

Был — Киров район Совете башҡарма комитетенең хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларына, ғаризаларына формаль, бюрократик ҡарашын характерләүсе факт булып тора. Бында 268 ғариза ҡаралмайынса ятҡырыла. Ҡаралғандары ла күп ваҡыт дөрөҫ хәл ителмәй.

Өфө ҡала Советенең үҙендә һәм уның бүлектәрендә лә хеҙмәтсәндәрҙең талаптарына шундай ҡарашы йәшәй. Жалобаларҙы һәм ғаризаларҙы ҡарау эшендә формаль, бюрократик мөнәсәбәт, волокита тулып ята. Жалоба һәм ғаризаларҙы ҡарап, хәл итеүҙә закон менән билдәләнгән срок үтәлмәй. Жалобалар буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешенә контроль булдырылмаған. Ҡала торлаҡ управлениеһендә һәм социаль тәьминәт бүлегендә үтәлеште тикшереү эше бөтөнләй ойошторолмаған.

Ҡала торлаҡ управлениеһенең элекке начальнигы Сергеев ғаризаларҙы, жалобаларҙы тикшереүҙә партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡаты ғәйепләнгән яраҡһыҙ, зарарлы юлға баҫҡан. Ул жалобаларҙы, ғаризаларҙы ҡарау, хәл итеүҙән бөтөнләй баш тартҡан, уларҙы икенсе ойошмаларға ебәргән һәм шуның менән үҙ бурысын үтәлгән тип иҫәпләгән. Шулай итеп, совет законын тупаҫ рәүештә боҙған. Бында һуңғы йылда ингән 360 жалоба һәм ғаризаның ни бары 95-е генә ҡарала. Уның да 80-е закондо тупаҫ рәүештә боҙоп хәл ителә. 212 жалоба 6—7 айҙан бирле ҡаралмай ятҡырыла.

Хеҙмәтсәндәрҙең ихтыяждарына йәнһеҙ, бюрократик ҡарашы өсөн Сергеев эшенән алынды. Ләкин ҡала торлаҡ управлениеһендә жалобаларҙы, ғаризаларҙы ҡарау эшенең яҡшырғаны юҡ әле.

Хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын, ғаризаларын ҡарау һәм хәл итеүҙәге бындай хәлгә килешеп ҡарау ғәфү ителерлек түгел. Ҡала Совете башҡарма комитете был етешһеҙлектәрҙе тамырынан уҡ бөтөрөү өсөн конкрет саралар күрергә бурыслы. Жалобаларҙы, ғаризаларҙы ҡарау закон менән билдәләнгән срокта үткәрелергә һәм ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың теүәл үтәлеүенә ныҡлы контроль булдырылырға тейеш.

Бер үк ваҡытта, хеҙмәтсәндәр араһында ойоштороу-массовый эштең кимәлен юғары күтәрергә, инвалидтарға, Ватан һуғышында һәләк булған воиндарҙың, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларына совет закондарын, льготалар биреү тәртибен ентекләп аңлатырға кәрәк. Бөтә общественный ойошмалар, ҡала һәм район Совете депутаттары, бөтә Совет активе был мөһим эштә актив ҡатнашырға бурыслылар.

Яр. Вәлиев.

Урындағы Советтәрҙең хужалыҡ эшенә етәкселек итеү кимәлен күтәрергә

Сталиндың яңы биш йыллыҡ план халыҡ хужалығын һуғышҡа тиклем булған кимәлгә еткереү һәм артабан үҫтереү бурысын ҡуя. Бөйөк еңеүҙәр программаһы менән ҡоралланған совет кешеләре биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн алған конкрет йөкләмәләрен тормошҡа ашырыуҙа ярышып эшләйҙәр.

Урындағы Советтәр был гүзәл ынтылыштың башында торорға, планды үтәү өсөн көрәште ойоштороусы булырға тейештәр. Сөнки «... улар массаларҙың туранан-тура үҙ ойошмалары, йәғни массаларҙың иң демократик һәм, тимәк, иң авторитетле ойошмалары... массаларҙың революцион энергияһын, инициативаһын, ижади булдыҡлылыҡтарын максималь рәүештә сиса торған ойошмалар» (И. Сталин).

Беҙҙең илебеҙҙең Конституцияһында ла урындағы Советтәр үҙҙәренә буйһондоролған органдарҙың эшмәкәрлегенә, урындағы хужалыҡ һәм культура төҙөлөштәренә етәкселек итәләр тип бик асыҡ әйтелгән.

Был законлы талаптарҙы дөрөҫ аңлаған ҡала, район һәм ауыл Советтәре хужалыҡ эштәре менән етәкселек итеүҙе көндән-көн яҡшырталар һәм хужалыҡ бурыстарын үтәүҙә күренекле уңыштарға өлгәшәләр.

Мәҫәлән, Черниковск ҡалаһы үткән йылда промышленность продукцияларын етештереү буйынса планын үтәй алмағайны. Быйыл ҡаланың промышленность предприятиеләре программаларын айҙан-айға арттырып үтәп киләләр. Быны сере шунда: ҡала Советы исполкомы халыҡ хужалығының бөтә мөһим мәсьәләләрен оператив хәл итеүгә, предприятиеләрҙең эшенә үҙенең етәкселеген, ярҙамын көсәйтеүгә һәм ҡала Советы депутаттарының актив ижади эшмәкәрлегенә ирешеү.

Бында Совет эшенә депутаттар һәм актив яҡындан ылыҡтырылғандар. Улар производство планының үтәлешен контролгә алалар, сессияларға предприятие етәкселәренең отчеттарын әҙерләйҙәр.

Былар бөтәһе лә урындағы Советтәрҙең хужалыҡ эштәре менән даими конкрет етәкселек итеүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора. Ләкин бөтә ерҙә лә былай түгел.

Бына Иглин районының Иҫке Ҡобау ауыл Совете (председателе иптәш Ҡадиров) хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәре менән бөтөнләй етәкселек итмәй, тип әйтерлек. Был ауыл Советына ҡараған «Беренсе Май» колхозында баҫыу эштәре насар ойошторолған, агротехник сараларҙы тупаҫ рәүештә боҙалар, колхозсылар араһында культура-ағартыу эше тейешенсә ойошторолмаған, баҫыуҙа хеҙмәт етештереүсәнлеге түбән.

Совет халҡы урындағы Советтәргә депутаттарҙы һайлағанда, уларға һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көрәштең башында торорға наказ бирҙе. Депутаттар һайлаусыларҙың был талаптарын эҙмә-эҙ үтәп барырға, хужалыҡ эштәрен уңышлы хәл итеү менән бергә культура төҙөлөшөн, сауҙа эштәрен һәм халыҡтың материаль көнкүрешен артабан яҡшыртыу юнәлешендә ныҡышмалы рәүештә эш алып барырға тейештәр. Быны уңышлы хәл итеүгә өлгәшеү өсөн партия ойошмалары совет органдары өҫтөнән оператив етәкселек итергә, совет аппаратында эшләүсе кадрҙарҙы ойоштороу-массовый эштәрҙең искусствоһына өйрәтергә, даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың һәм депутаттарҙың эшенә дөрөҫ йүнәлеш бирергә бурыслылар.

Был, урындағы Советтәргә хужалыҡ эшенә етәкселек итеүҙәренең кимәлен артабан күтәреүгә ныҡ ярҙам итер.

И. Нигматуллин.

Өфө еп иләү фабрикаһының иң яҡшы ватерщицаһы Р. Гәрәева производство нормаларын систематик рәүештә арттырып үтәй.

Һүрәттә: Иптәш Р. Гәрәева эш өҫтөндә.

В. Жданов фотоһы.

Мәскәүлеләргә яуап итеп

Мәскәү предприятиеләре коллективтарының йыллыҡ производство пландарын Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығы көнөнә үтәү тураһындағы патриотик башланғыстары Ишембай ҡалаһы предприятиеләре араһында йәнле отклик тапты. Ошо айҙанды ҡала предприятиеләрендә митингылар, йыйылыштар, кәңәшмәләр булып үтте.

Ҡала предприятиеләренең коллективтары элекке йөкләмәләрен ҡайтанан ҡарап һәм эске мөмкинлектәрҙе иҫәпкә алып, үҙҙәренең йыллыҡ производство пландарын 7 ноябргә тамамларға, пландан тыш күп кенә продукция бирергә тигән күтәренке йөкләмәләр алдылар.

Директорҙары Варшавер, Васяев, Посалкин булған заводтар, икенсе промысел һәм башҡа ҡайһы бер предприятиелар, промартелдәр биш айлыҡ пландарын срогынан алда, арттырып үтәнеләр.

Предприятиеләрҙең коллективтары һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы планын йөкләмәлә алынған срокта үтәү өсөн көрәш ойошторалар.

Х. Дәүләтшин.

Брак бөтөрөлдө

Өфө металлоштамп заводының эшселәре, инженер-техник работниктәре 1948 йылдың производство планын срогынан алда, 15 октябргә үтәү өсөн ныҡышмалы рәүештә көрәшәләр. Социалистик ярыштың киң ҡолас алыуы хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ күтәрҙе. Алдынғы стахановсылар Иванюта, Вавилова, Титова, Бензин иптәштәр көн һайын бер ярым норма бирәләр.

Заводта беренсе урынды тотоп килгән начальнигы иптәш Макушкин булған цех график буйынса эшләп, көндәлек заданиеһен систематик арттырып үтәй. Цех биргән продукцияның сифаты яҡшы. Брак бөтөнләй бөтөрөлдө.

Коллектив ярты йыллыҡ планды биш айҙа үтәне һәм шуның менән бергә продукцияның үҙкиммәтен 13,8 процентҡа түбәнәйтеүгә өлгәште.

А. Иманғулов.

Эш үҙ ағышына тапшырылған

Поляковка прискаһы управлениеһенең Ильинка участкаһына ҡараған «Игеҙ Дәүләт» старателдәр артеле беренсе квартал производство планын үтәп еткермәне. Һуңғы айҙарҙа ла күрһәткестәр түбән.

Пландарҙың үтәлмәүе артель правлениеһенең, бигерәк тә уның председателе Ермиловтың производство менән оператив етәкселек итмәүенән, эште дөрөҫ ойоштормауынан килә. Бында үтәлеш тикшерелмәй. Шуныңтан кем күпме эшләгәнлеген, нормаһын күпмегә үтәгәнлеген дә белмәй. Алдынғы забойщиктәрҙең тәжрибәһе уртаҡлашылмай. Ярыш таҡтаһы булдырылмаған.

Председатель Ермилов хатта артелдә күпме стахановсы барлығын да белмәй. Ә бит артелдә үҙенең нормаһын 125—150 процентҡа үтәүсе Ильичев, Шәрәфетдинов, Сәләхов, В. һәм Н. Ҡотлоәхмәтовтар кеүек стахановсылар ҙа юҡ түгел. Ҡыҙғаныска ҡаршы алдынғыларҙың эш өлгөләре башҡаларға күсерелмәй.

Прискаһың етәкселәре был старателдар артеленең эшен яҡшыртыу өсөн конкрет сара күрергә тейештәр.

Н. Якупова.

СӘСЕҮЛЕКТӘРҘӘ БЕР ГЕНӘ ҠЫЙ ҮЛӘНЕН ДӘ ҠАЛДЫРМАҪҠА!

нормалар арттырылып үтәлә

Мәсетле районы Карл Маркс исемендәге колхоздың комсомолецтәре һәм йәштәре юғары урожай үҫтереү буйынса социалистик ярышта алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәйҙәр.

Комсомолец-йәштәрҙән торған звеноларҙың өсәүһе лә яҙғы сәсеүҙе 10 көн срокта, юғары сифатлы итеп үткәрҙе. Хәҙер звенолар бөтә көстө сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенә тупландылар. 60 гектар бойҙай һәм 50 гектар арыш сәсеүлектәре өҫтәмә аҙыҡландырылды. Шулай уҡ утау эштәре киң йәйелдерелде. Баҫыу эшендә Ханов, Вафин, Ғилманова, Афзалова, Нафикова, Мофтахова, Галина һәм башҡа иптәштәр көндәлек норманы систематик рәүештә арттырып үтәйҙәр.

Р. Ғәлимьянова.

* * *

Яҙғы сәсеү планын 110 процентка үтәп, Дүртөйлө район Совете исполкомының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алған «Ағым» колхозы сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә лә уңышлы эшләй.

Колхоз партия ойошмаһы эргәһендәге агитколлектив массовый-политик эштең яҙғы баҫыу эше осорондағы тәжрибәләрен утаусылар һәм пар һөрөүселәр араһына күсерҙе. 15 агитатор звеноларҙа эш алып бара.

Хәҙер колхозда 115 гектар пар күтәрелде һәм 200 гектар сәсеүлек утаулды. Утаусылар араһында социалистик ярышта Фәғилә Бәхеттәрәева звеноһы алда бара. Был звеноның алдынғылары һәр көн норманы 150—200 процентҡа үтәйҙәр.

Ғ. Басиров.

Беренсе ҡат утауҙы тамамланылар

КРАСНОУСОЛ. (Телефон аша). «Ҡанаш» колхозы членары сәсеүҙе срогында яҡшы сифатлы итеп үткәреү, сәсеүлектәрҙе хәстәрле тәрбиәләү һөҙөмтәһендә үҙған йыл юғары урожай алғайнылар.

Быйыл звенолар тағы ла юғарыраҡ урожай алыу өсөн үҙ участкаларында ныҡышмалы эш алып баралар. Иптәш Васильева етәкселек иткән звено үҙ участкаһында тәүге тапҡыр утауҙы колхозда беренсе булып тамамланы. Бөтәһе 21 гектар арыш, 23 гектар бойҙай утаулды. Был звено менән ярышҡа сығыусы Плотникова, Федорова иптәштәрҙең звено членары ла утауҙа яҡшы эшләйҙәр.

«Урожай» колхозында 1 июндән башлап бөтә звенолар ҙа утауға төштөләр. Бында 140 гектар арыш, 92 гектар бойҙай, 40 гектар арпа сәсеүлектәре ҡый үләндәренән таҙартылды. «Йондоҙ» колхозында ла утауҙа көн һайын 300-ҙән артыҡ колхозсы эшләй.

Йәғфәр Ғәлиев.

Һанаулы ғына көндәр ҡалыуға ҡарамаҫтан...

АҠЪЯР. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Хәйбулла районы колхоздары быйыл общественный маллар өсөн 265 мең 425 центнер бесән, 20 мең тонна силос әҙерләргә тейештәр. Был күләмдә мал аҙығы әҙерләүҙе тәьмин итеү өсөн колхоз етәкселәре бесән сабыуға әҙерлекте инде теүәлләргә тейештәр ине. Ләкин әҙерлек бик аҡрын бара.

«Яңы юл» колхозында (председателе иптәш Кунакасов) 4 сапҡыс машинаның тик береһе генә ремонтланған. Ат менән бесән йыйғыстар бөтөнләй ремонтланмаған. 8 фургондың тик 2-һе генә әҙерләнгән. Колхоз етәкселәре быға сәбәп итеп, запас частарҙың етешмәүен күрһәтәләр. Ләкин уларҙы булдырыу өсөн практик саралар күрелмәй. «Стальной конь» колхозында (председателе иптәш Василенко) бесән әҙерләү кампанияһын үткәреү өсөн күпме һәм нинҙай машиналар кәрәк булыуын да белмәйҙәр. «Красная поляна» колхозында ла бесән сапҡыс 7 машинаның тик 2-һе генә әҙер. Ә ҡалғандарына ремонт эше лә алып барылмай. Колхоз тимерлеге көн буйына ябыҡ тора. Фрунзе һәм Буденный исемендәге колхоздарҙа ла бесән йыйыу машиналары ремонтланмай. Районда бер генә колхозда ла ҡул салғылары, тырмалар әҙерләнмәйҙәр.

Бесән йыйыуға әҙерлек эшенең ойошторолмауы арҡаһында районда 170 сапҡыс машинаның 40-ы ғына ремонтланды. Бесән йыйғыстарҙы ремонтлау эше ни бары 13 процентҡа ғына үтәлде.

Район ауыл хужалығы бүлеге етәкселәре яңы машиналар көтөп, колхоздарҙы запас частәр менән тәьмин итмәйҙәр. Бер генә колхозға ла бесән әҙерләү графигы бирелмәгән.

Районда бесәнгә төшеүгә һанаулы ғына көндәр ҡалды. Был хәл уға әҙерлекте көсәйтеүҙе һәм кампанияны яҡшы ҡаршылауҙы талап итә.

Р. Шафикова.

Утау ҡыҙыу бара

Борай районы «Марс» колхозында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше киң йәйелдерелде.

Беҙҙең звено быйыл 10 гектар арыш, 10 гектар бойҙай, 3 гектар тары һәм бер әр гектар картуф һәм киндер тәрбиәләй. Звено арыш һәм бойҙай сәсеүлектәрен утауҙы тамамланы, инде башҡа культуралар утала башланы.

Х. Моратов.

* * *

Стәрлетамаҡ районы «Муравей» колхозы членары сәсеүҙе уңышлы тамамлаған көйөк, сәсеүлектәрҙе лә ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр. Иптәш Шаҡтәрәева Рәдиғә звеноһы 120 гектар майҙанда утау үткәрҙе.

Шулай уҡ Ворошилов, Ленин исемендәге, «Яңауыл», «Красный герой», «Смычка» колхоздарында ла массовый рәүештә утау эштәре бара. 5 июнгә район буйынса 6000 гектарҙан артыҡ сәсеүлек ҡый үләндәренән таҙартылды.

Ғ. Ибраһимов.

* * *

Ҡариҙел районы «Муллаҡай» колхозы баҫыуҙарында утау ойошҡан рәүештә бара. Бында көн һайын 60 кеше эшләй. Эш иртәнге сәғәт биштән алып кискә ҡараңғыға тиклем дауам итә.

Шафиҡ Ғилминуров етәкселек иткән орлоҡсолоҡ звеноһы өс көндә 25 гектар сәсеүлекте утаны. Башҡа звенолар ҙа ярышып эшләйҙәр. Утауҙа алдынғылар — Кәфиә Әкбәрова, Нәфҡиә Шәйнурова һәм Фәрхиә Моғинова иптәштәр көндәлек норманы 150—170 процентка үтәйҙәр. Колхозда инде 80 гектар майҙанда сәсеүлек ҡый үләндәренән таҙартылды.

Ғ. Исмәғилов.

Колхозда һабан туйы үткәрелә

Әлшәй районы Сталин исемендәге колхоз ерҙе сәсеүҙе уңышлы үткәрҙе. План буйынса 1450 гектар урынына 1500 гектар һабан ашлыҡ культуралары сәселде. Бында 15 июндә һабан туйы үткәрелә. Колхозсылар был байрамға утауҙы һәм пар һөрөүҙе тамамлау менән килергә ҡарар иттеләр.

Хәҙер колхоздағы 8 баҫыусылыҡ бригадаһының бөтә звенолары ла баҫыуҙа ярышып эшләйҙәр. Иптәш Ғәйниә Гәрәева етәкселек иткән орлоҡсолоҡ звеноһы 16 гектар бойҙай сәсеүлеген ҡый үләндәренән таҙартты.

Пар һөрөүҙә трактористәр ҙә ярышалар. М. Латипов етәкселек иткән бригаданың трактористәре быйыл был колхозда 500 гектар пар күтәрергә тейештәр. Хәҙер план яртылаш үтәлде. Сирай Гараев, Солтан Йәғфәров, Хәйри Әхмәтьянов, Мөхәмәт Йосопов, Хәким Сафин һәм Ғабдулла Мостафин иптәштәр «НАТИ» тракторында көн һайын 8 гектар урынына, 16-шар гектар ер һөрәләр.

М. Нагаев.

Сәсеүлектәрҙе һуғарыу эшен ойошторайыҡ!

Дәүләкән районының «Яңы тормош» колхозы һуғарылған участкаһын һәр бер гектарынан 30-ар центнер, ә һуғарылмаған ерҙә гектарҙан 3,5-әр центнер бойҙай урожайы алды. Шул уҡ райондың «Ҡыҙыл Урал» колхозында ла был сара ҡулланылды. Өс тапҡыр һуғарылған участка гектарҙан 29,2 центнер, ә һуғарылмаған участка гектарҙан ни бары 4,4 центнер генә урожай бирҙе. Миәкә районының «Ҡыҙыл партизан» колхозында ла шундай уҡ миҫалды күрергә мөмкин. 39 гектар һуғарылған ерҙә һәр бер гектарҙан урожай 27-шәр центнер, ә был сара ҡулланылмаған участкаларҙа урожай гектарҙан 5-әр центнер генә тәшкил итте. Айырма бик ҙур.

Был миҫалдар 1939 йыл практикаһынан килтерелә, сөнки һуңғы йылдарҙа сәсеүлектәрҙе һуғарыу эше беҙҙең Башҡортостан колхоздарында бөтөнләй ҡулланылмай башланы.

1939 йыл ныҡ ҡына ҡоролоҡло йыл ине. Ул ваҡыт Башҡортостандың күп кенә колхоздары сәсеүлектәрҙе һуғарыу эше менән шөғөлләнделәр һәм күп культуралар буйынса юғары урожай алдылар.

Быны өсөн колхоздар ваҡ йылғаларҙы, күлдәрҙе һәм быуаларҙы файҙаландылар. Һуғарыу системаһы артыҡ ҡатмарлы түгел ине. Уларҙы колхоздар үҙ көстәре менән төҙөнеләр һәм сәсеүлектәрҙе иң ябай юлдар менән һуғарҙылар. Һөҙөмтәлә, юғарыла килтерелгән миҫалдарҙан күренгәненсә, һуғарыу аша һәр гектарҙан 5—10 тапҡыр артыҡ урожай алынды.

Ҡоролоҡҡа ҡаршы көрәшеүҙә һәм тотороҡло юғары урожай алыуҙа иң ышаныслы был сара һуғыштан һуңғы йылдарҙа ғәфү ителмәҫлек насар хәлдә тора.

Быны төп сәбәбе ҡайҙа һуң? Бәлки был эш хәҙер үҙенең әһәмиәтен юғалтҡандыр? Йә булмаһа, уны яңынан аяҡҡа баҫтырыу өсөн ҙур расход һәм көс талап ителә торғандыр?

Беҙҙеңсә, был сәбәптәрҙең береһе лә аҡланыу өсөн нигеҙ була алмайҙар. Төп сәбәп һуғарыу эшенә баһа биреп еткермәүҙә, уға колхозсылар массаһын туплағмауҙа. Шул арҡала был эш ташланҙыҡ хәлгә килтерелде. Миҫал өсөн Бүздәк районының Тимирязев исемендәге колхозын күрһәтеүҙә ета. Унда һуғышҡа тиклем Сәрмәсән йылғаһын быуып, ирригация системаһы төҙөлә башлағайны. Ул колхозға электр көсө биреү менән бергә, сәсеүлектәрҙе һуғарыу өсөн дә файҙаланылырға тейеш ине. Быны ҡороу өсөн күп көс түгелде, кәрәкле оборудованиелар алынды. Ләкин система әле булһа хәрәкәткә килтерелгәне юҡ. Район һәм колхоз етәкселәре быға күп сәбәптәр күрһәтәләр: техника етешмәй, быныһы етешмәй, етәкселек итер өсөн инженер һәм техник та таба алмайбыҙ, тиҙәр. Ләкин уларҙы булдырыу өсөн практик саралар күрелмәй. Колхоз председателе райондан, ә район етәкселәре Ауыл хужалығы Министерствоһынан ярҙам көтөүҙе дауам итәләр.

Һуғарыу эше быйыл айырыуса мөһим сара. Ул игенселектең дөйөм культураһы үҫә барған һайын күберәк файҙа бирергә тейешле ирригацион система булып тора. Башҡортостанда һуғарыу эшен ойоштороу өсөн уңайлы ваҡ йылғалар һәм күлдәр күп. Был һыуҙар менән бер нисә йөҙ мең гектар сәсеүлектәрҙе һуғарырға мөмкин. Уларҙа һуғарыуҙы ойоштороу саралары ҙур көс һалыуҙы талап итмәйҙәр. Күп урындарҙа йылға һәм күлдәрҙе кәрәкле юнәлешкә йырып ебәреү аша һуғарыуға файҙаланырға мөмкин. Һуғышҡа тиклем йылдарҙа Дим буйы колхоздары ошондай юлдар менән сәсеүлектәрҙе һуғарып килделәр. Уларҙы быйыл да тулы файҙаланырға мөмкин. Һуғарыу участкаларына арыҡтар, бураҙналар һәм каналдар буйлап һыу килтереү ауыр эш түгел. Был өлкәлә беҙгә Үзбәкстан республикаһының колхоздарынан өлгө алып эшләргә кәрәк.

Республика колхоздарында һуғарыу сараларын ойошторорға, электән хәрәкәт итеп килгән һуғарыу участкаларын аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Государство әһәмиәтендәге был мөһим эште йәйелдереү һәм уға конкрет етәкселек итеү эшен БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһы, район ауыл хужалығы бүлектәре һәм МТС-тар үҙ өҫтәренә алырға тейештәр.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының «Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһындағы» ҡарарында колхоз һәм совхоздарҙа һуғарыу эшенә ҙур әһәмиәт бирелә. Был ҡарарҙы үтәү нигеҙендә беҙҙә хәҙер йөҙҙәрсә һуғарыу участкаһы эшләргә тейеш ине. Үкенескә ҡаршы, хәҙергә уларҙың береһе лә эшләмәй әле. Хөкүмәт ҡарары буйынса Стәрлетамаҡ тәжрибә баҫыуында өлгө тәжрибә һуғарыу участкаһы ойошторолорға тейеш булһа, ул һаман хәрәкәткә индерелмәгән.

Һуғарыу эшенә иғтибарһыҙлыҡҡа бынан ары юл ҡуйылырға тейеш түгел. Был эшкә колхоз һәм совхоздарҙа бөтә көстө туплағырға һәм сәсеүлектәрҙе планлы рәүештә һуғарыуҙы ойошторорға кәрәк.

Агроном В. Ғирфанов.

Израиль государствоһы сит ил эштәре министренең белдереүе

ТЕЛЬ-АВИВ, 9 июнь. (ТАСС). «Израиль тауышы» радиоһы Израиль государствоһы һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу һәм ярашыуҙар тураһында тәҡдим ҡабул итте, тип тапшыра. Бөгөн урындағы һәм сит ил хәбәрселәре алдында сығыш яһап, Израиль государствоһы сит ил эштәре министры Моше Шерток БМО посреднигы Бернадоттың тәҡдимен ҡабул итеү тураһында үҙ иленең ҡарар иткәнлеген белдерҙе. «Ярашыуҙың шарттары, беҙҙең өсөн бөтөнләй күңелһеҙ булыуы ап-асыҡ булһа ла, — тине Шерток, — беҙ уға риза булдыҡ. Беҙ был ярашыуҙы ике сәбәп буйынса ҡабул иттек. Беренсенән, шуның өсөн — әгәр ғәрәптәр һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатһалар, беҙ һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатырға үҙебеҙҙең әҙер икәнлегебеҙ тураһында һуғыштың башында уҡ әҙмә-әҙле белдереп килдек; икенсенән, беҙ үҙ политикабыҙҙы БМО политикаһына ярашлы алып барыу теләгебеҙҙе белдерәбеҙ».

Шерток былай тине: — һуғыш һәктәһе яғынан ярашыу Израиль өсөн артыҡ кәрәк нәмә булып тормай. Еврей государствоһының һоҡланғыс рәүештә үҫеше һәм ныҡыуы уға үҙенә ҡаршы башланған агрессияның беренсе һөжүмենә бирешмәҫкә мөмкинлек бирҙе. Еврей государствоһы үҙенең тамырҙарын тиҙ һәм тәрән йәйә. Ваҡыт беренсе тапҡыр беҙҙең файҙаға хеҙмәт итә. Ярашыу авторҙарынан кем дә булһа берәү был ярашыу еврейҙәрҙе йонсотор һәм юл ҡуйырға мәжбүр итер тип ышанған булһа, был — хаталаныу. Проблема тик еврей государствоһы һәм уның күршеләре араһында ярашыу кәрәклектән генә тора.

Шерток, ғәрәптәрҙең агрессияһы уларҙың үҙҙәре өсөн ҡот осҡос әҙемтәле булып тора, тип билдәләне. Һуғыш хәрәкәттәре һөҙөмтәһендә ғәрәптәр йәшәгән 200 ауыл эвакуацияланды. Ғәрәп халыҡтары Яффа, Хайфа, Акра, Тиберия һәм башҡа ҡалаларҙы ташлап киттеләр һәм был ҡалалар хәҙер еврейҙәр контроле аҫтындалар. Иерусалимдәге хәл тураһында Шерток былай тине: Иерусалим халыҡ-ара ҡала булып әүереләсәк тип Лейк-Саксеста ҡарар ителде. Иерусалимдең ғәрәптәрҙең башҡалаһы булыуына беҙ бер ваҡытта ла риза булманыҡ һәм риза булмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә Иерусалимда халыҡ-ара режим урынлаштырырға риҙалыҡ булмаһа, ул саҡта Иерусалимде ғәрәптәр хакимлегенән һаҡлап ҡалыу өсөн көрәш яңынан башланасаҡ.

Официаль рәүештә белдергәндән һуң Моше Шерток хәбәрселәрҙең һорауҙарына яуаптар бирҙе. Израиль территорияһында ғәрәп ғәскәрҙәре бармы? тигән һорауға, ул: ғәрәп ғәскәрҙәре илдең көньяғында ғына бар, Галилейҙа улар юҡ, тип яуап бирҙе. Унда үтергә ынтылыусы ғәрәп ғәскәрҙәре ил сигенән ҡыуылдылар. Ярашыу ваҡытында еврейҙәрҙе иммиграциялау тураһындағы һорауға Шерток түбәндәге яуапты бирҙе: ярашыуҙың ҡайһы бер пункттары лайыҡлы түгел тип иҫәпләһә лә, Израиль был ярашыуҙы бер һүҙһеҙ ҡабул итте. Граф Бернадотт бер генә яҡтың да хәрби өҫтөнлеге булмауын теләне. Ул иммиграцияны дауам иттереүгә риза булды, ләкин хәрби хеҙмәт йәшендәге ирҙәргә ҡарата сикләүҙәр буласаҡ.

Әгәр ғәрәптәр Израиль государствоһын танымаһалар, БМО-ның сик тураһындағы ҡарарҙарын ваҡытлы хөкүмәт үҙе өсөн мәжбүри тип иҫәпләрме? тигән һорауға яуап биреп, Шерток былай тине: Беҙ Израилдең сиктәре тураһындағы ҡарарға, бәлки уға төҙәтеү индерелер, тип иҫәпләп, Лейк-Саксеста риза булғайныҡ, БМО Палестинала еврей государствоһы, Иерусалимда Палестина ғәрәптәренең государствоһын төҙөүҙе һәм халыҡ-ара режим урынлаштырыуҙы, шулай уҡ бөтә Палестина экономик союзын төҙөүҙе күҙҙә тотҡайны. Әгәр ошондай план көсөндә ҡалһа, беҙ уға риза булабыҙ, әгәр көсөндә ҡалмай икән, ул саҡта беҙ үҙ йөкләмәләребеҙҙе үтәүҙән үҙебеҙҙе азат тип иҫәпләйәсәкбеҙ.

Оборона процесында беҙ Израиль государствоһы территорияһынан ситтәге бик күп ғәрәп ауылдарын алдыҡ.

Советтар Союзының үҙ күҙәтселәрен Палестинаға индереү талаптары тураһындағы һорауға Шерток ярашыуҙы тормошҡа ашырыу өҫтөнән контролдә ҡатнашыуҙа Советтар Союзы үҙ талаптарын ҡуйырға хоҡуҡлы тип яуап бирҙе. Ваҡытлы хөкүмәт өсөн Англия күҙәтселәре ҡабул ителергә ярарлы булырҙармы? тигән һорауға Шерток ваҡытлы хөкүмәт Великобритания нейтраль түгел тип иҫәпләп, Англия офицерҙарын ҡатнаштырыуға ҡаршы килә, тип яуап бирҙе.

Германияға ҡарата алты илдең планы тураһында Америка матбуғаты

НЬЮ-ЙОРК, 9 июнь. (ТАСС). Германия тураһында 6 ил коммюникеһенә комментарий урынлаштырыусы газеталар уны «алыҫҡа китеүсе план» тип ҡарайҙар. Ассошиэйтед Пресс агентствоһының Вашингтондағы хәбәрсеһе Хайтауэр, көнбайыш державаларҙың килешеүе «коммунизмға ҡаршы ҙур стратегияның бер өлөшө булып тора», тип иҫәпләй. Юғарыла күрһәтелгән килешеүгә өлгәшеү эшендә Америка дипломаттарының инициативаны үҙҙәренә алғанлыҡтарын Хайтауэр таный.

Конгрестең ҡарашы әлегә билдәле түгел әле. Юнайтед Пресс агентствоһы 7 июндә кис: сенатор Тафт беренсе дәрәжәләге әһәмиәткә эйә булып торған килешеү «Германия менән ярашыу договорының фактик өлөшө булып тора, һәм хәҙерге күрһәтмәләргә ҡарап, фекер йөрөткәндә күп йылдар буйы көсөндә ҡаласаҡ» тип белдергән икән, тип хәбәр итте.

«Нью-Йорк геральд трибюн» газетаһы редакцион мәҡәләһендә 6 ил планының «яңы Германия төҙөү буйынса оҙаҡ срокҡа иҫәпләнгән проект» булып торғанлығын таный. Газетаның һүҙҙәренә ҡарағанда, тәҡдим ителгән сараның төп өҫтөнлеге шунан тора, ул көнбайыш Германияның экономикаһын бөтә Көнбайыш Европа менән бәйләргә мөмкинлек бирер.

Германия хөкүмәтен төҙөү планы тураһындағы белдереүҙәрҙе Вашингтон матбуғаты күренекле урынға урынлаштырҙы. Вашингтондың «Ивнинг стар» тигән газетаһы «килешеү... һис шикһеҙ, Германияны бүлеүгә тура-нан-тура перспектива тыуҙыра, бүлеүҙең герман халҡы тарафынан тулыһынса яҡланыуға осрамауы мөмкин, ә Францияла политик кризисте тиҙләтәсәк һәм хатта Көнсығыш һәм Көнбайыш араһындағы булған упҡынды тәрәнәйтәсәк» тип иҫәпләй. Газета, ошо кире яҡтарына ҡарамаҫтан, план үтәлергә тейешле, тип уйлай.

«Нью-Йорк пост» газетаһының Вашингтондағы хәбәрсеһе Чайлдс былай тип яҙа: Нью-Йорк банкирҙәре көнбайыш Германиянан ҙур табыш алырға ышаналар. Улар «доллар ярҙамында Германияла бик аҙ ғына сумма иҫәбенә файҙа ала алырбыҙ тип күрһәтәләр. Германияның промышленносен Маршалл планына ярашлы рәүештә аяҡҡа баҫтыра барған һайын был рәүештә капитал һалыуҙар яҡын көндә ғәҙәттән тыш файҙалы буласаҡтар».

«Нью-Йорк пост» газетаһының хәбәрсеһе Грэфтон тәҡдим ителгән герман государствоһын яһалма тип атай һәм, был государствоның тыуыуы «ысын мәғәнәһендә яңы, ҡайтанан тыуған һәм ысын мәғәнәһендә демократик Германияның тыуыуына булған өмөттөң үлеүен аңлата...» тип яҙа.

«Дейли Уоркер» газетаһы, иҫке, серек бөткән прусско-нацистик Гитлер картелдәре һәм ҡоралланыу магнаттары тарафынан быҡауланған Германия 6 ил менән бергә яңы хәрби союзда үҙенең урынын ала, тип белдерә. «Көнбайыш Германия государствоһы тип аталған государство» Вашингтон банкирҙарының һәм генералдарының күптәнге хыялы ине.

Газета былай тип билдәләй: Вашингтон Советтар Союзына һәм халыҡ демократияһы илдәренә ҡаршы арсенал сифатында монополистик Германияны яңынан тыуҙырырға һәм Францияла, Италияла, Англияла һәм Рурҙа халыҡ хәрәкәтенә ҡаршы көрәштә герман фашизмен сукмар итеп файҙаланырға, шулай уҡ Европаның ҡалған өлөшөн индустриялаштырыуҙы блокадалау өсөн тырыша. Газетаның һүҙҙәренә ҡарағанда, «Германия реакцияһын Американың союзнигы сифатында ошо рәүештә аяҡҡа баҫтырыуҙа Маршалл планы үҙенең ысын йөҙөн күрһәтә. Вашингтондың коммунизмға ҡаршы ҡоралһыҙ һуғышы Европаның башҡа илдәренә ҡаршы һуғыш алып барыу өсөн Уолл-Стриттең герман трестары менән файҙалы килешеүе булып күренә.

Радиолаштырыу эшенә иғтибар юҡ

Үткән йылдың йәйендә Ҡариҙел урман промышленносе хужалыҡтары яңы радиоузел оборудованиелары килгәс, эшселәр бик шатландылар.

— Уйынмы ни? Хәҙер көн дә Мәскәүҙе тыңлаясаҡбыҙ!

— Ләкин шатлыҡ былай барлыҡ сыҡмаһа. Радиоузел алыу бер эш, ә уны һайлатеу икенсе эш.

— Радиоузелде алыуға ҡарағанда уны эшкә ебәреү ауырыраҡ, —ти урман һәм һал ағыҙыу эшселәре союзы Өлкә Комитете председателе иптәш Зайцев. Ысындан да, урман хужалыҡтары өсөн профсоюз Үҙәк Комитетенән 8 радиоузел алынғайны, ләкин уларҙың береһе лә эшләмәй, складтарҙа ята.

Яман-йылға механизациялаштырылған урман пунктынан эшсе Петров былай тип яҙа: «Радионы беҙҙә — урмансылар кеүек ныҡ яратыусылар бармы икән? Радио бит беҙҙе бөтә ил, Мәскәү менән бәйләүсе тере еп булып тора. Урманға газеталар һуңлап килә, ә радио көн һайын өр яңы хәбәрҙәр килтерә. Бына ни өсөн беҙ радиоузел алғас ҡыуанғайныҡ. Ләкин 6 ай үтте, радио өндәшмәй әле...»

Эш нимә һуң? Күрәһең, радиоузелдәрҙе эксплоатацияға биреү өсөн тәүҙә радио етәкселәрен урынынан ҡуҙғатырға, Союзтехрадионың урындағы бүлеге (иптәш Афанасьев) радиоузелде юлға һалып ебәреүҙе, Радио селтәрҙәре Управлениеһенә (иптәш Голомазов) контролер килеп, радиоузелде һәм трансляцион селтәрҙе ҡабул итеп ... ҡушырға рөхсәт итмәгәнлектән, радионың тулы тауыш менән һөйләй башлауына иҫәп тотоу ҡыйын.

Дөрөҫ, айырым профсоюз ойошмалары радиоузелде үҙҙәре генә эшләтергә тырышып ҡаранылар, ләкин был уларға ҡимматҡа төштө. Бындай ваҡыттарҙа, күктән төшкәндәй, Башҡортостан радиокомитетенең абонемент түләүҙәрен йыйыу бүлеге мөдире — штрафтар йыйыусы Ҡурамшин килеп төшә. Профком председателдәренә меңәр һум штраф түләргә тура килеүе аҙ булмады. Ошондай уҡ штрафтарҙы МТС һәм совхоз профкомдарына ла түләштерергә тура килә икән. Сәсеүҙең иң ҡыҙыу ваҡыттарында Стәрлетамаҡ, Әлшәй, Һеүәнәк, «Шемәк», Ҡарлыман, «Смычка», Өршәк һәм Цурюпа исемендәге һәм башҡа совхоздарҙа радиоузелдәр эшләмәй. «Спартак» совхозы узеленең монтажы өсөн профсоюз Өлкә Комитете 38 мең һум түләне. Ә радио һаман да эшләмәй. Урман эшселәре посёлкаларын радиолаштырыу өсөн ебәрелгән 85 мең һум аҡсаның бер тинен дә Урман промышленносе Министрлығы тотонмаған әле. Бөрйән урман промышленносе хужалыҡтары өсөн ебәрелгән 600 радиоточка оборудованиеһы ярты йыл инде Өфөнөң УРС базаһында ята. 8 март исемендәге совхоздың директоры Әхтәмов радиотрансляцион селтәр бағаналарын «хужалыҡ кәрәктәре» өсөн алған. «Шемәк» совхозы директоры Бронников профсоюз Өлкә Комитете тарафынан ебәрелгән радиоаппаратты үҙ йортондағы иҫке аппаратҡа алмаштырған.

Башҡортостан радиокомитете эшсе поселкаларын радиолаштырыу урынына, был эштә штрафтар йыйнау менән генә мауыға. Союзтехрадионың Башҡортостан бүлеге радио узелдәрҙе хеҙмәтләндереү өсөн күп аҡса талап итә; Государство аҡсаһы туҙҙырыла, ә радиоузелдәр эшләмәй. Шемәк радиоузеле барлығы 900 һум тора, ә уның монтажы өсөн 28 мең һум алдылар.

Урман эшселәрен радио менән хеҙмәтләндереүгә ҙур иғтибар бирергә кәрәк. Бөтә радиоузелдәр ҙә нормаль эшләй башларға тейештәр.

Н. Ртищев.

Йәйге матур көндәрҙә йәш натуралистарға йәйге эштәр өсөн пинекте киң астылар. Республикан балалар техник станцияһында улар төрлө емеш ағастары, сәскә, ҡыуаҡтар үҫтерәләр.

Һүрәттә: Өфө ҡалаһының 1-се номерлы ҡыҙҙар мәктәбенең 6—«А» класында уҡыусы, тәжрибәле йәш натуралистка Роза Ғәбитова (уңда) виноградты тәрбиәләү ваҡытында. Дүртәйлә Өфө ҡалаһының 2-се номерле урта мәктәбенең 5—«А» класында уҡыусы Фәриҙә Хәббуллина (һулда) ул башҡа йәш натуралистарҙың эштәрен ҡарарға килгән.

В. Жданов фотоһы.

Рокоссовский исемендәге колхозда

Ташҡын көсәйә барҙы. Осҡонҡыр һәм Яманҡыр тауҙарынан шарлап ағып төшкән ҡар һыуҙары Биҙгенде йылғаһына ҡушылды. Әнеф алдынан тыңа тигеҙ ағып ятҡан был йыуаш йылға төндөң икенсе яртыһына ауышҡанда инде ярҙарынан ашып сыҡты. Шашынып аҡҡан һыу быуа өҫтәнә бәреп меңде һәм тирмәнде уратып алды.

Тирмәнсе Ҡиәмәтдин Хафизов ҡарт көтөлмәгәндә килеп сыҡҡан был хәл тураһында колхозға белдерергә лә өлгөрмәне, һыу тирмән бинаһын сайҡалта башланы. Колхозсылар килеп еткән саҡта инде тирмән дә, быуа ла ташҡын менән киткәйне. Ҡейемдәре һыуланған Ҡиәмәтдин ҡарт ҡуйы һары таллыҡтар араһынан килеп сыҡты.

— Иә инде, былай булыр тип кемдең башына килһен, ғүмерҙә булмаған хәл бит был,—тине ул.

Ә колхоз правлениеһендә өс коммунист был бәләнән иңсек тиҙерәк һәм уңайлыраҡ ҡотолоу саралары тураһында һөйләштеләр. Ауылдаштарының һорауы буйынса күптән түгел генә райком аппаратынан ҡайтып, колхозда председатель булып эшләй башлаған Ибһүл Азнабаев:

— Ике-өс көн эсендә тирмәнде аяҡҡа баҫтырырға кәрәк. Шуның беҙгә ҡыйын буласаҡ, — тине. Председателдең һүҙен ҡеүәтләп, Ватан һуғышы инвалиде, өс орден кавалеры Мәғәсумов:

— Минеңсә, был юлы инде Биҙгенденең икенсе шаяра алмаҫлыҡ итеп теҙгенләргә кәрәк. Киләһе йылдан да һунға ҡалмайынса электр станцияһы төҙөргә тура киләсәк бит беҙгә,—тине.

Ярты сәғәттән һуң правление ултырышы йыйылды, унда колхозда төҙөлөш эштәре үткәреү өсөн махсус бригада ойоштороға ҡарар ҡабул ителде. Уға етәксе итеп колхоздың иң намыҫлы кешеһе; элекке фронтовик Нуретдин Бүләкбаев билдәләнде.

Төҙөүселәр бригадаһы икенсе көнө уҡ тирмәнде аяҡҡа баҫтырыу эшенә тотондо. Шулай уҡ колхоз ауылын төҙөкләндереү өсөн дә эш башланды. Төҙөләш эштәренең иң ауыр, иң яуаплы урындарында коммунистар, элекке фронтовиктар булдылар.

Колхоз хәҙер танымаҫлыҡ булып үҙгәрҙе. Быуа янында иҫкеһенә ҡарағанда ике тапҡыр ҡеүәтлерәк яңы тирмән һалынды. Мал өсөн торлаҡ төҙөлдө. Орлоҡ һалыу өсөн келәттәр һалынды. Бер йыл эсендә колхоз ауылы бөтөнләй яңы төҫ алды. Хәҙер колхозда кирбес заводы төҙөлә. Кирбестәр яндыра торған мейестәр инде әҙер. Колхозда электр станцияһы төҙөү өсөн дә әҙерлек бара. Станция өсөн 6.5 киловатлыҡ динамо килтерелде. Станцияның урыны билдәләнде, төҙөләш материалдары ташыла башланы.

Аһылай ауылында быйыл Ильич лампалары балҡыясаҡ.

Колхозда хеҙмәткә яраҡлы 54 кеше. Уларҙың бөтәһе лә колхозды аяҡҡа баҫтырыу, артабан үҫтереү өсөн арымай-талмай эшләйҙәр.

Был — Әбйәлил районы Рокоссовский исемендәге колхоз.

М. Хәйдаров.

Театрҙар йәйге сезонда

Башҡортостан государство академия театры йәйге сезонда 47 кешелек состав менән Челябинск һәм Свердловск өлкәләренә гастролгә китте. Ул Магнитогорск, Нижний Тагиль, Капийск, Троицк ҡалаларында буласаҡ.

Театр репертуарында: «Балҡанда» (С. Мифтахов), «Ҡара йөҙҙәр» (В. Ғәлимов, Ғ. Әмири), «Таңсулпан» (К. Даян), «Яҡты йылға» (Ғ. Ғүмәр), «Тормош йыры» (М. Әмир), «Бай һәм хеҙмәтсе» (Ниязи), «Ғәлиәбаныу» (М. Фәйзи), «Башмағым» (Х. Ибраһимов), «Хажи әфәнде өйләнә» (Ш. Камал) һәм башҡа пьесалар бар. Театр гастролдә 5 сентябргә тиклем буласаҡ.

Опера һәм балет театры 8 июндә Чкалов ҡалаһына китте. Унда «Евгений Онегин», «Пиковая дама», «Русалка», «Травиата» «Риголетто», «Чио-чио сан», «Паяцы», «Ҡарлуғас», «Алтын сәс» опералары һәм «Аҡҡош күле», «Баҡса-һарай фонтаны», «Сыңғырау торна», «Капеллия» балеттәре ҡуйыласаҡ.

Ф. Иҫәнғолов.

„Октябрь" журналының 5-се номере

«Октябрь» журналының 5-се номере баҫылып сыҡты.

Туғандаш республика халыҡтары әҙәбиәте бүлегендә совет Молдавияһы шағирҙәре Е. Б..., Л. Корняну, Б. Истру, Г. М... шиғырҙары урынлаштырылған.

Проза һәм шиғырҙар бүлегендә Әкрәм Вәли, Хәниф Кәрим, Ла... ман Хәким һәм Ғилмдар Рамазанов очерктәре, Әнүәр Бикчәнтәев новеллалары, Ҡадир Даян, Тимәр Арслан, Батыр Вәлит шиғырҙары урынлаштырылғандар.

Йәлил Киекбаевтың «Башҡорт телендә орфоэпия мәсьәләләре» исемле фәнни мәҡәләһе баҫылған.

Публицистика һәм тәнҡит бүлектәрендә СССР Фәндәр Академияһының член-корреспонденты А. М. Еголиндең «30 йыл эсендә совет әҙәбиәте» исемле мәҡәләһе, филология фәндәре кандидаты Әхнәф Хәритең Ибраһим Абдуллиндең пьесаһы «Девон» тураһында яҙған театраль тәнҡите, С. Агиш, Ғ. Рамай, Ғ. Камал, З. Шәрипова ... таштарҙың тәнҡит мәҡәләләре бар.

Суд залынан

Ҡараҡтар группаһы

В. Ломзотов, Б. Нестеров, Н. Чупрынин һәм Г. Магдеев ... дәрҙән торған ҡараҡтар группаһы Дәүләкән районы Ҡаҙанғол ... поһының магазинең ватып, 9 ... 133 һумлыҡ төрлө тауарҙар ... аяҡ кейемдәре, тегеү фабрикаһының складына инеп 8 мең ... һумлыҡ күн тауарҙары урлағандар. Шулай итеп улар государствоға 17 мең 621 мең һум ... зыян килтерәләр.

Был ҡараҡтар группаһы ... лоп, хөкөмгә бирелгәйне. ... көндәрҙә Дәүләкән район ... да 1-се участка халыҡ суды ... тар группаһының енәйәтен ... тикшереп, В. С. Ломзотовты ... йылға, Б. Ф. Нестеровты 20 ... Н. Ф. Чупрынинде, Г. В. Маг... инде 15-әр йылға ирктәренән ... рум итергә һәм милкәттәрен ... фисковать итергә хөкөм итте.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

ӨФӨ ИНДУСТРИАЛЬ ТЕХНИКУМЫ

1948—1949 УҠЫУ ЙЫЛЫНА УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ

Техникум керамика промышленносе өсөн техниктәр-технологтар әҙерләй. Уҡыу срогы 4 йыл.

Техникумға 7 клас күләмендә белеме булған, 14—30 йәштәге һәр ике енес граждандары ҡабул ителә.

Ҡабул ителеүселәр тулы булмаған урта мәктәп программаһы күләмендә рус теленән (телдән һәм яҙма), математиканан (телдән һәм яҙма) һәм СССР Конституцияһынан һынауҙар үтәләр. 1946—1947 уҡыу йылында тулы булмаған урта мәктәпте йәки урта мәктәптең 7 класын отличноға тамамлаусылар һынауһыҙ ҡабул ителәләр.

Уҡырға инеү тураһындағы ғаризалар 1 июндән ҡабул ителәләр.

Ғаризаға түбәндәге документтәр: белем тураһында танытма (подлинниктә), йәше тураһында танытма (подлинниктә), автобиография, өс фотокарточка, ғәскәри хеҙмәткә мөнәсәбәт тураһында справка (военнообязанныйҙар өсөн), һаулыҡ тураһында врач справкаһы беркетелеп, техникум директоры исеменә биреләләр.

Ҡабул итеү һынауҙары 10 августан 25 августҡа тиклем үткәрелә. Уҡыуҙар 1 сентябрҙә башлана.

Ҡабул ителеүселәр дөйөм торлаҡ һәм постель әйберҙәре менән тәьмин ителәләр. Уҡыуҙа өлгәшеүселәргә 140 һум һәм унан юғары күләмдә стипендия бирелә.

Техникумды тамамлаған йәш техниктәр-специалистәр төрлө край һәм республикаларҙағы төҙөү материалдары промышленносе заводтарына цех начальниктәре, техник-технологтар һәм лаборатория начальниктәре итеп ебәреләләр.

Техникумдың адресе: **Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 108-се номерле йорт, 38-се номерле мәктәп.**

Дирекция.

ЯБАЙЛАШТЫРЫЛҒАН ЮЛ... МЕНӘН ҮҘЕНДЕ СТРАХОВАТЬ ИТЕҮ

(врачтың танытмаһынан башҡа)

16 йәштән алып, 60 йәш... тиклем булған граждан... 15 йәки 20 йыл срокҡа ... рен страховать итә алалар.

Страховать итеү сумма... страховать ителеүсенең йәш... нә һәм страхование срогы... ҡарап, 800 һумдан 1200 һу... ға тиклем билдәләнә.

1-се, 2-се, 3-сө, 4-се һәм 5-се номерле страховой документ... тәр буйынса страховать ит... ләргә мөмкин.

Страховой взностар түбә... дәгесә: 15 йылға — айына ... һум, ә 20 йыл срокҡа стра... вать ителгәндә — (һәр по... ҡә) айына 5 һум алына.

Страховать ителеү срогы ... тулған, йәки берәр төрлө ... хетһеҙлеккә осрап, хеҙмәт... һәләтлеке юғалтҡан ваҡыт... ла, страхование сумма... страховать ителгән кеше... үҙенә, ә страховать ител... кеше үлгән ваҡиғала — стра... ховой документтә күрһәтел... гән кешегә түләнә.

Башгосстрах.

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00780 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө кала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 117
13
июнь
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Бөтә тракторҙарҙы һәм йәнле тартыу көстәрен пар һөрөүҙә тулы нагрузка менән файҙаланырға! (1-се бит).
КОМСОМОЛДЫҢ 30 ЙЫЛЛЫҒЫНА ҠАРАТА
А. Юрьев. — Большевиктар партияһы — комсомолды ойоштороусы һәм уның етәксеһе. (2-се бит).
1948 йылдың май айында валовой продукция эшләп сығарыуҙың государство планы үтәлеше йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының Башҡорт АССР-ы буйынса уполномоченныйы белдереүе. (2-се бит).
А. Насибуллин. — Коммунистарҙе идеологик тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирелә. (2-се бит).
Малсылыҡты үҫтереү планын һәр бер колхоз буйынса үтәргә! (3-сө бит).
И. Сайгин. — Яҡшы аттар үҫтереүселәр. (3-сө бит).
С. Арсеньев. — Почталы радист. (3-сө бит).
Ә. Ихсан. — Башҡорт дивизияһының боевой эшенән. (3-сө бит).
ТӘНҠИТ ҺӘМ БИБЛИОГРАФИЯ. Баязит Бикбай. — Шағирҙең тәүге аҙымы. (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Актив—партия ойошмаһының таянысы

Социализм иленең бөйөк төҙөлеш программаһы булған — сталинсе яңы биш йыллыкты дүрт йылда үтәү өсөн көрәш — бөтә халыҡ көрәше булып әүерелде. Шул айҡанлы хеҙмәтсәндәр массаһының пайҙаһын үҫтереү производство һәм политик күтәрелеше барлыҡҡа килде. Массаның был активлеген бик һаҡсыл өйрәнеү, уның бар предприятиеләрҙә һәм колхоздарҙа уңышлы эшләүе өсөн көрәштә ... — урындағы партия ойошмаларының мөһим бурысы булып тора.

Партия ойошмаларының массаны бөйөк көрәшкә ойоштороу һәләтлектәре кадрҙарҙы, партиялы һәм партияһыҙ активҡа таяныу эшен күрергә бик бәйләнгән. Партияның XXI өлкә конференцияһынан һәм район конференцияларынан һуң күп кенә райкомдар партия, совет активен тәрбиәләү һәм уларға таянып эшләүҙә, тәүге партия ойошмалары секретарҙарын активкә таяныу эштәренә өйрәтеүгә ҡайһы бер һынылыш яһанылар. ВКП(б)-ның Ҡандра, Туймазы, Яңауыл райкомдары һәм башҡа ҡайһы бер райкомдар партия активенең йыйылыштарын, пленумдарын, тәүге партия ойошмалары секретарҙарының, колхоз һәм ауыл Советтәре председателдәренең семинарҙарын план буйынса регуляр рәүештә үткәрәләр. Был райкомдар етәкселек эшенә яңы килгән, йәш кадрҙарҙы тәрбиәләүгә, уларҙы эштә үҫтереүгә ҙур иғтибар бирәләр. Улар айырым семинарҙар, тәжрибә уртаҡлашыу буйынса кәңәшмәләр үткәреп һәм уларға урындағы партия ойошмаларының эш тәжрибәһе буйынса практик ярҙам күрһәтәләр.

Партияның Ҡандра райкомы былтыр колхоздарҙа күп һанда эшкиләр сбарҙы ... Райком секретарҙары һәм бюро членары артта ҡалған колхоздарҙа күберәк булыусы, унда тәүге партия ойошмаһы ... партия ойошмалары секретарҙарына актив менән эшләргә өйрәтеүҙә төп бурыс итеп ҡуйҙылар. Райком секретаре иптәш Заринов бер нисә йылдар буйына артта ҡалып килгән «Ингуған» колхозына барып, тәүге партия ойошмаһының колхоз етәкселек итеүен, хеҙмәтсәндәр араһында политик тәрбиә эштәре ойоштороуын, актив туплау һәм уға таянып эшләүен яҡшыртыуҙа партия ойошмаһы секретаре иптәш Вәлиуллинаға бик ҙур ярҙам итте. Ауыл активы, агитаторҙарға доклад темалары бирелде, беседалар үткәреү ойошторолдо. Шул арҡала колхоз партия ойошмаһы, актив ярҙамы менән, бөтә кәсте эшкә ... уңышлы тамамлау өсөн көрәшкә күтәрә алды. Райком бюроһы члены Хабибуллин, инструктор Мартынов иптәштәр «Яҡты юл» һәм «Ҡыҙыл байраҡ» колхоздары партия ойошмаларына ошондай уҡ булышлыҡ күрһәттеләр. Тәүге партия ойошмаларының ролдәрен күтәреүгә, актив менән эшләүгә иғтибарҙы көсәйтеү уңышлы һөҙөмтәләр бирҙе. Колхоз партия ойошмалары үҙ тирәләренә актив туплап, ошо актив аша массовый политик эште киң йәйелдереү юлы менән хеҙмәтсәндәрҙе яҙғы сәсеү эштәрен ҡыҫҡа срокта, юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн ысын социалистик ярышҡа күтәрә алдылар. Шул арҡала район яҙғы сәсеүҙе республиканың алдынғы райондары сафында тамамланы.

Үкенескә ҡаршы, әле беҙҙә кадрҙарҙы урынһыҙға тартҡылау, активкә таянып эш күреүҙе баһалап еткермәү хәлдәре лә бик йыш осрай. Бына ВКП(б)-ның Дәүләкән райкомы (секретаре иптәш Масленников) һуңғы ярты йыл эсендә районның ауыл хужалығы бүлеге мөдирен һәм шул уҡ бүлектең баш агрономын колхоздарға «етәкселекте тәьмин итмәүҙәре» өсөн ике тапҡыр эштәренән бушатты, ике-өс ай ваҡыт үтеү менән уларҙы тағы ла шул уҡ урындарына ҡуйҙы. Кадрҙарға быңдай мөнәсәбәттең партия установкаһы менән һис бер төрлө уртаҡлығы юҡ. Быларҙан башҡа ла Дәүләкәндә һуңғы ярты йыл ваҡыт эсендә төрлө сәбәптәр менән тиҫтәләгән работниктар урындарынан алынды. Был хәл райком етәкселегенең кадрҙар менән эшләй белмәүен, активкә таянмауын бик асыҡ күрһәтә. Иптәш Сталин кадрҙар менән түҙемле эшләргә өйрәтеп былай тине:

«Кадрҙарҙы дөрөҫ һайлап алыу ул:... кадрҙарҙы партияның һәм государствоның алтын фонды итеп баһалау, уларҙы ҡәҙерләү, уларға хөрмәт менән ҡарау;... кадрҙарҙы белеү, һәр бер кадровый работниктең яҡшы яҡтарын һәм етешһеҙлектәрен ентекләп өйрәнеү, работниктең һәләтлеге ниндәй поста бөтәһенән дә еңелерәк йәйелеүе мөмкинлеген белеү;... кадрҙарҙы хәстәрле рәүештә тәрбиәләп үҫтереү, һәр бер үҫеп барыусы работникка юғары күтәрелеүгә ярҙам итеү, бындай работниктар менән түҙемле рәүештә «мәшәҡәтләнеү» өсөн ваҡытты ҡыҙғанмау һәм уларҙың үҫеүен тәьмин итеү, тигән һүҙ», — тине.

Ауыл һәм район активе урындағы Советтарға һайлауҙар һәм шулай уҡ яҙғы сәсеү осоронда агитаторҙар һәм пропагандистар сифатында хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эш алып барыуҙа партияның тәүге ойошмаларына һәм район комитеттәренә бик ҙур ярҙам күрһәтте. Улар политик темаларҙа докладтар менән сығыш яһанылар, беседалар үткәреү юлы менән партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарын массаға еткереп барҙылар. Шулай уҡ был активтең күпселек өлөшө производствола, политик-хужалыҡ кампанияларын үтәүҙә үҙҙәренең шәхси өлгөләре менән киң массаны хеҙмәт күтәрелешенә рухландырҙылар, социалистик ярышты ойоштороусылар һәм ярышта башлап барыусылар булдылар.

Хәҙер партия ойошмаларының бурысы — актив менән эшләүҙәге был бай тәжрибәләрҙән тулыһынса файҙаланып, массовый-политик эште тағы ла киңерәк йәйелдереү юлы менән хеҙмәтсәндәрҙе биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылы программаһын срогынан алда үтәү өсөн, социалистик баҫыуҙарҙа тағы ла мулыраҡ урожай яулап алыу өсөн көрәшкә күтәреүҙән тора. Алда торған был бөйөк бурыстарҙы уңышлы үтәү өсөн көрәштә партиялы һәм партияһыҙ актив — партия ойошмаһының таянысы ул.

Тәүге партия ойошмалары секретарҙәренең кәңәшмәһе

11 июнда, ВКП(б)-ның Өфө горкомы, кала учреждениеләрендәге тәүге партия ойошмаларының эштәрен артабан яҡшыртыу маҡсатында, партияның тәүге ойошмалары секретарҙәре ҡатнашлығында кәңәшмә үткәрҙе. Кәңәшмәлә 160 кеше ҡатнашты.

ВКП(б)-ның Өфө горкомының беренсе секретаре иптәш Фокин «Кала учреждениеләрендәге тәүге партия ойошмаларының эше һәм уларҙың бурыстары», — тигән темаға доклад яһаны.

Доклад буйынса фекер алышыуҙарҙа «Спиртотрестың» тәүге партия ойошмаһы секретаре Чаплыгин, Министрҙәр Советы тәүге партия ойошмаһы секретаре Ғәйсин, Ауыл хужалығы Министерствоһының тәүге партия ойошмаһы секретаре Воколенко, Башҡорт АССР-ы прокуратураһының тәүге партия ойошмаһы секретаре Мурашов иптәштәр үҙҙәренең эш тәжрибәләре менән уртаҡлаштылар.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусылар кала учреждениеләрендәге тәүге партия ойошмаларының эшен артабан яҡшыртыу буйынса конкрет саралар билдәләнеләр.

Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөндә

Ҙур ойошҡанлыҡ

Ишембай—Ермолаевка тимер юлының ҙур өлөшө Мәләүез районы аша үҙа. Район хеҙмәтсәндәре был мөһим объектты төҙөүгә айырыуса шатланып ҡаранылар һәм ойошҡан рәүештә ҙур энтузиазм менән трассала эшкә башланылар.

Төҙөүҙә ҡатнашыу срогы бер ай ине, колхозсылар үҙҙәренә яңы йөкләмәләр алып, трассала эште 15—20 көндә тамамлауға һүҙ бирҙеләр. Алдынғы колхоздар был срокты ла ҡыҫҡарталар.

«Пробуждение» колхозы (председателе иптәш Туманин) трассаға беренселәрҙән булып сыҡты. Колхоздан юл төҙөүҙә 25 йәйәүле эшсе һәм 5 ат эшләй. Нормалар арттырылып үтәлә. Был колхоз үҙенә бирелгән күләм заданиеһен 15 июнгә үк тамамлаясаҡ.

«Рассвет I» колхозынан трассаға иптәш Бородин етәкселек иткән бригада килде. Бригада составында 67 эшсе. Колхоз председателе иптәш Бутров та эшселәр янында. Хеҙмәт аныҡ ойошторолдо. Һөҙөмтәлә колхоз 30 көнлөк заданиене 10 көндә үтәп сығасаҡ.

«Политотдел», «Смычка», «Красная поляна», «Золотой колос» һәм Молотов исемендәге колхоздар шулай уҡ яҡшы эш өлгөләре күрһәтәләр.

Трассала эш ысын хеҙмәт тантанаһына әйләнде. Заданиеләрҙе срогынан алда үтәү, бөйөк халҡ төҙөлешөн яҡшы сифатлы итеп башҡарыу уйҙары һәр кемдең йөрәген солғап алған.

Төҙөлештә энтузиазмдең көслө, рух күтәренкелегенең юғары булыуында район ойошмаларының политик-массовый эштәрҙе яҡшы ойоштороуҙары ҙур роль уйнай. Трассаға 17 агитатор сығарылды. Улар юлда эшләүселәр араһында ҡыҫҡырып газеталар уҡыйҙар һәм «боевой листоктар» сығаралар. Һәр колхоздың эш участкаһында ярыш таҡталары бар.

Киске ҡараңғы төшөүгә колхозсылар янына күсмә кино ла килеп етә. Трассала эшләүселәр өсөн ошо көндәрҙә «Рус мәсьәләһе» кино картинаһы күрһәтелде. Район политпросвет бүлеге төҙөүселәр араһына махсус бригада сығарҙы. Уның составында 6 кеше, улар участкаларҙа концерттар бирәләр. Программала—халҡ йырҙары һәм халҡ бейеүҙәре.

Яланда дүрт урында радиоприемник ҡуйылды.

ВКП(б)-ның Мәләүез район комитете юл төҙөүселәр араһында докладтар, лекциялар һөйләү өсөн махсус докладсылар группаһы булдырҙы.

Трассала тәүге көндәрҙә

11 июнда Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөндә ун меңдән артыҡ колхозсы эшләне. Ике район — Стәрлетамаҡ һәм Стәрлебаш райондарының колхозсылары бер нисә мең кубометр ер ҡаҙыу, балсыҡ ташыу эштәрен башҡарҙылар.

Юл төҙөлөшөндә эшләүсе колхозсылар төҙөү эштәрен срогынан алда тамамлау өсөн участкаларҙа үҙ-ара социалистик ярыш йәйелдерҙеләр. Айырым колхозсылар тәүге көндәрҙән үк үҙҙәренә бирелгән нормаларҙы арттырып үтәүгә өлгәштеләр.

БӨТӘ ТРАКТОРҘАРҘЫ ҺӘМ ЙӘНЛЕ ТАРТЫУ КӨСТӘРЕН ПАР ҺӨРӨҮҘӘ ТУЛЫ НАГРУЗКА МЕНӘН ФАЙҘАЛАНЫРҒА!

☆ ☆ ☆

Тракторҙар ҙа, аттар ҙа файҙаланылмай

УСТЬ-ИКИН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Мәсетле районының «Красная Башкирия», Матросов һәм Карл Маркс исемендәге колхоздары яҙғы сәсеүҙе июнь башында тамамланылар. Уларға бөтә йәнле тартыу көстәрен һәм тракторҙарҙы пар һөрөү эшенә күсерергә мөмкин ине. Ләкин колхоз етәкселәре был эште ашыҡтырмайҙар, аттарҙы икенсе дәрәжәләге эштәрҙә файҙаланалар.

«Красная Башкирия» колхозында (председателе иптәш Хоҙайбирҙин) 22 эш аты бар. Улар һабанға егелеү урынына, күрше колхоздан ой бүрәнәләре ташыу өсөн өмәлә файҙаланылалар. Шулай уҡ пар һөрөүгә тейеш булған тәгәрмәсле трактор ҙа, яғыулыҡ һәм майлау материалдары етешмәү арҡаһында, аҙналар буйына тик ултыра. Колхоз тик 9 июндә генә пар күтәреү эшенә башланы. Ләкин эш бик аҡрын бара. Баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиры иптәш Хәсәнов:

— Беҙгә «НАТИ» тракторы килергә тейеш. Ул килеү менән пар һөрөү эше гөрләйәсәк. Ә хәҙергә аттар ауыл Советының төҙөлөш эштәрен башҡаралар, — ти.

Колхозда пар күтәреү эшенә иғтибар ителмәү арҡаһында график көн һайын өҙөлә. Иң яҡшы сроктар үтеүгә ҡарамаҫтан, бында 111 гектар урынына, тик 12 гектар ғына ер һөрөлдө.

Матросов исемендәге колхозда ла шундай уҡ хәл. Бында сәсеү 31 майҙа уҡ тәүәлләнде. Колхозда 31 баш эш аты бар. Ләкин аттарҙың береһе лә пар һөрөүгә беркетелмәгән. Улар колхозсыларҙың үҙ хужалыҡтарындағы эштәрҙе башҡарыу өсөн бирелгәндәр. Колхоз председателе иптәш Мирсаев күрше совхоздың бер тракторын пар һөрөүгә алған, ләкин ул да ни бары 45 гектар ғына ер һөргән. 105 эш аты булған Карл Маркс исемендәге колхозда ла тик 16 ат ҡына пар һөрөүҙә файҙаланыла. Бында был эшкә көндә 40—45 һабан ҡуйырға мөмкин. Был мөмкинлектәрҙе файҙаланмау һөҙөмтәһендә колхоз 426 гектар пар һөрөү планын 12 көндә ни бары 67 гектар ғына үтәне.

Пар һөрөү эшенә әһәмиәт бирмәүсе колхоздар районда күп кенә. Әле 28 колхозда был эш бөтөнләй башланмаған. Шуның һөҙөмтәһендә районда 10 июнгә ни бары 1500 гектар ер һөрөлдө. Ә план буйынса бөтәһе 15 мең 500 гектар ер һөрөлергә тейеш. Район ауыл хужалығы бүлеге һәм район Советы исполкомы етәкселәре пар һөрөүҙең ғәфү ителмәҫлек аҡрын барыуына килешеп ҡарайҙар, колхоз һәм МТС етәкселәренән пар һөрөү графигенең үтәлеүен талап итмәйҙәр.

Н. Ғәлимов.

☆

Пар һөрөүҙе өҙәләр

ПЕТРОВСК. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Маҡар районында пар һөрөү өҙәлдө. ВКП(б)-ның район комитете бюроһы үҙенең ултырышында пар һөрөүҙе тамамлауҙа яңы срок — 15 июнде билдәләне һәм яңы график төҙөргә ҡарар сығарҙы.

Был «яңы график» буйынса көн һайын 750 гектар майҙанда пар күтәрелергә тейеш ине. Ләкин ул систематик рәүештә үтәлмәй килә. Бында 8 июнгә ни бары 700 гектар ер һөрөлдө, ул пландың ни бары 7 процентын тәшкил итә. Әле күпселек колхоздар был эшкә бөтөнләй башламағандар.

— Сәсеү ҙә бөтмәгән, әле парға ныҡлап тотоноп булмаҫ,—ти район ауыл хужалығы бүлегенең мөдире иптәш Евдокимов.

Шул уҡ һүҙҙәрҙе күп кенә колхоз председателдәре ҡабатлайҙар һәм мөмкин була тороп та, пар күтәреүҙе ойоштормайҙар. Тракторҙар паркының тик яртыһынан аҙы ғына баҫыу эштәрендә ҡатнаша. Шулай уҡ аттарҙың да күбеһен икенсе эштәрҙә файҙаланалар.

Матросов исемендәге колхозда 36 эш аты һәм 20 үгеҙ бар. Сәсеү бында тамамланған, шулай булыуға ҡарамаҫтан, бер генә ат та һәм үгеҙ ҙә пар һөрөүгә ҡушылмаған.

— Нигә ҡабаланырға, парҙы трактор һөрөп бирер әле,—ти колхоз председателе Сухоруков. Бында һуң һөрөлгән парҙың агротехник әһәмиәте кәмеүе менән иҫәпләшмәйҙәр. Шундай уҡ хәл «Красная Москва», «Объединение», «Победа» һәм башҡа колхоздарҙа ла йәшәй. Бер генә колхозда ла пар һөрөү өсөн һабансылар бүленмәгән һәм заданиелар бирелмәгән.

Ҡайһы бер колхоздарҙа пар һөрөүгә билдәләнгән тракторҙарҙы башҡа эштәргә файҙаланалар. Мәҫәлән, «Яңы йорт» колхозында Петровск МТС-ының иптәш Соткин бригадаһы пар һөрөргә тейеш булһа, ул тары сәсеү өсөн ер эшкәртергә ҡушыла. Ә колхоз председателе Абдуллин тары өсөн һөрөлгән ерҙе, пар һөрөлдө, тип мәғлүмәт бирә. Калинин, Молотов исемендәге һәм башҡа колхоздарҙа ла тракторҙар һәм йәнле тартыу көстәре пар күтәреүҙә файҙаланылмайҙар.

Былар осраҡлы хәл түгел, сөнки район етәкселәре колхоз председателдәренән һәм МТС директорҙарынан пар һөрөүҙе тиҙерәк тамамлауҙы талап итмәйҙәр. Эш үҙ ағышы менән бара.

Ғ. Ҡотлобаев.

☆

Республика колхоздарында пар һөрөүҙең барышы тураһында СВОДКА

(План үтәлеше 1948 йылдың 10 июненә, проценттарҙа)

Тотҡан урыны	Райондар исеме	Һөрөлгән
1	Туймазы	80,0
2	Яңауыл	55,4
3	Дәүләкән	44,9
4	Асҡын	37,5
5	Покровка	34,0
6	Салауат	33,4
7	Өфө	31,2
8	Балтач	29,5
9	Бөрө	25,3
10	Оло-Тәләк	24,8
11	Байҡыбаш	22,8
12	Дыуан	22,8
13	Иглин	22,2
14	Баҡалы	21,4
15	Ҡыйғы	20,9
16	Шишмә	20,6
17	Тәтешле	20,2
18	Белоҡатай	18,5
19	Мишкә	17,2
20	Ҡандра	17,1
21	Благовещен	16,9
22	Белорет	15,2
23	Краснокам	13,6
24	Әбйәлил	13,5
25	Маҡар	13,0
26	Шаран	12,8
27	Архангель	12,3
28	Ҡалтасы	12,3
29	Әлшәй	11,8
30	Ғафури	11,2
31	Абзан	10,6
32	Нуримап	10,2
33	Баймаҡ	10,1
34	Стәрлетамаҡ	10,0
35	Борай	9,7
36	Йәрмәкәй	9,2
37	Бүздәк	8,8
38	Саҡмағош	7,6
39	Учалы	7,2
40	Кушнаренко	6,7
41	Миәкә	6,6
42	Бозаяз	6,5
43	Мәсетле	6,4
44	Дүртөйлө	6,3
45	Илеш	5,6
46	Ауырғазы	4,2
47	Стәрлебаш	4,0
48	Бишбүләк	3,9
49	Ҡырмыҫҡалы	3,8
50	Благовар	3,4
51	Йомағужа	2,8
52	Бәләбәй	2,3
53	Мәләүез	1,1
54	Күгәрсен	1,1
55	Федоровка	1.1
56	Кейәргәҙе	0.5
57	Воскресен	0,2

Трактористар яҡшы эшләйҙәр

Иглин районының «Родина» колхозын хеҙмәтләндереүсе Таутөмән МТС-ының иптәш Зандерсон бригадаһы яҙғы баҫыу эштәрен уңышлы тамамлап, пар күтәреүҙе йәйелдерҙе. Бригада яҙғы һөрөү һәм культивациялау планын 112 процентҡа, ә тырматыу һәм сәсеүҙе 175 процентҡа үтәне.

Колхоз баҫыуында хәҙер 136 гектар пар һөрөлдө. Трактористтарҙан Ермолаев, Рәхмәтуллин һәм Шәфиҡов иптәштәр һәр көн норманы арттырып үтәйҙәр.

Х. Ғатауллин.

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Донбастың һыу баҫҡан шахталарынан һыуҙан ҡотҡарыуҙың тиҙләтеү методтарын уйлап сығарған һәм, шуның менән, һуғыштан һуң Донбастың аяҡҡа баҫтырылыуын тиҙләткән өсөн бер төркөм специалистарға беренсе дәрәжәләге Сталин премияһы бирелде.

Һүрәттә: премия алыусыларҙан: **Гейер** Виктор Георгиевич — Донецк индустриаль институтының доценты, **Игнатов** Николай Николаевич — Күмер промышленносы Министерствоһының инженеры, группаның етәксеһе, **Картозия** Арнольд Теймуранович — Көнбайыш главшахтастройының начальнигы, **Хорунжий** Валентин Алексеевич — «Сталинуголь» комбинатының баш механигы, **Прохоров** Василий Дмитриевич — «Артемуголь» комбинатының баш механигы.

ТАСС фотохроникаһы.

Комсомолдың 30 йыллығына ҡарата

Большевиктәр партияһы—комсомолды ойоштороусы һәм уның етәксеһе

— Большевиктәрҙең бөйөк партияһы — комсомолды ойоштороусы һәм уның етәксеһе булды. Ленин — Сталин партияһы комсомолды алға алып бара һәм рухландыра, уны большевизмдең боевой традициялары рухында тәрбиәләй, көрәшергә һәм еңергә өйрәтә.

Социалистик революция булырҙан күп алда уҡ әле Владимир Ильич Ленин алдынғы эшсе йәштәрҙе революцион көрәштә ҡатнашырға, партия эшенә саҡырҙы.

Партияла эшсе йәштәр күп булған өсөн большевиктәрҙе шелтәләүсе меньшевиктарға яуап биреп, Ленин ғорурлыҡ менән былай тине: «Беҙ һәр ваҡыт алдынғы синыф йәштәренең партияһы булаһаҡбыҙ». Был ваҡытта Ленин Энгельстең ошо һүҙҙәренә таяна ине: «...Беҙҙең революция партияһында йәштәрҙең күпселек тәшкил итеүе тәбиғи түгелме ни? Беҙ киләсәктең партияһыбыҙ, ә киләсәк—йәштәр ҡулында. Беҙ новаторҙар партияһыбыҙ, ә новаторҙар артынан йәштәр һәр ваҡыт дәрт менән баралар. Беҙ иҫке серекләккә ҡаршы фиҙакәр рәүештә көрәшеү партияһыбыҙ, ә фиҙакәр көрәшкә һәр ваҡыт беренсе булып йәштәр барасаҡ».

Большевиктәр етәкселегендә алдынғы хеҙмәтсе йәштәр батша самодержавиеһын һәм буржуазияны ҡолатыу өсөн геройҙарса көрәште, ул йылдарҙа уҡ әле Ленин йәштәрҙең революцион ойошмаһы принциптарын эшләп сығарҙы, уның маҡсаттарын һәм бурыстарын алдан билдәләне.

1917 йылғы февраль революцияһынан һуң Петроградта һәм Мәскәүҙә, Уралда һәм Украинала — бөтә илдә эшсе йәштәр союздары төҙәлә башланы. Уларҙың етәкселәре — большевиктәр ине.

Партияны ҡоралды восстаниеға йүнәлдергән РСДРП-ның алтынсы съезы йәштәрҙең союздары тураһында ҡарар ҡабул итте. Съезд, йәштәрҙең рухани яҡтан партия менән бәйләнештә булған, уның резервы булып хеҙмәт итерлек һәм партия уның арҡыры йәштәрҙе тәрбиәләү эшен алып барырлыҡ үҙ алдына эшләй торған массовый ойошмаһын төҙөү тураһында үҙ фекерен яҙып ҡалдырҙы.

Партияның алтынсы съезының ҡарарҙары революцион йәштәрҙең көстәрен туплауға саҡырыу булды. Йәштәрҙең ойошмалары большевиктәр байрағы аҫтына баҫып, арта һәм нығый барҙы. Йәш эшселәр Ҡыҙыл гвардия сафтарына инделәр, һуғыш эшенә өйрәнделәр.

Октябрь алдынан, ҡоралды восстание планын билдәләп, Ленин «Ситт кеше кәңәштәре» тигән үҙенең хатында — иң мөһим боевой операцияларҙа ҡатнашыу өсөн ваҡ отрядтарҙан торған эшсе йәштәрҙе ебәрергә директива бирҙе. Был, революцион йәштәрҙең боевой сифаттарына, большевиктәр партияһына уның ысын күңелдән бирелгәнлегенә юғары баһа булды. Һәм йәштәр Октябрь көрәштәре утында үҙҙәренең ҡурҡыуһыҙ һәм фиҙакәр батырлыҡтары менән социалистик революцияның бөйөк юлбашсыһының ышанысына достойны булыуҙарын күрһәттеләр.

Октябрь еңеп сыҡҡандан һуң ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа булған йәштәр союздары берләшә башланы.

1918 йылда йәштәр союзының беренсе Бөтә Россия съезын саҡырыу буйынса әҙерлек эштәре партияның туранан-тура етәкселегендә һәм уның актив булышлығында алып барылды.

Эшсе һәм крәҫтиән йәштәре союздарының беренсе съезы 1918 йылдың 29 октябрендә асылды. Ул комсомолға — большевиктәр партияһы етәкселегендә эшләүсе, йәштәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуйыусы йәштәрҙең берҙәм коммунистик ойошмаһына башланғыс һалды.

Ленин менән Сталин Совет государствоһы системаһында комсомолдың тотҡан урынын, уның бурыстарын, уның партия менән үҙ-ара мөнәсәбәттәрен тулы асыҡлыҡ менән билдәләнеләр.

Ленин комсомолының бөтә данлы тарихы бөйөк Ленин—Сталин партияһы эшенә үҙ-үҙен аямай хеҙмәт итеү, героик көрәш һәм батыр хеҙмәт подвигтарының тарихы ул. Граждандар һуғышының ҡаты көрәштәрендә, тыныс социалистик төҙөлеш йылдарында — сталинсы биш йыллыҡтар төҙөлешендә, Бөйөк Ватан һуғышының ҡурҡыныслы көндәрендә һәм хәҙер — Тыуған илебеҙҙе һуғыштан һуң үҫтереүҙең мөһабәт планын тормошҡа ашырған ваҡытта ла комсомол үҙен партияның тоғро ярҙамсыһы итеп күрһәтте.

1920 йылда комсомолдың өсөнсө съезында сығыш яһап Ленин йәштәргә уларҙың бөйөк маҡсаттары — коммунистик общество төҙөү эшен достойно рәүештә дауам иттереү һәм тамамлау тип күрһәтте. Был маҡсатҡа өлгәшер өсөн йәштәр уҡырға, коммунизмде өйрәнергә, үҙҙәрен коммунист итеп тәрбиәләргә тейештәр. Йәштәрҙе ленинизм рухында тәрбиәләү —комсомол алдына иптәш Сталин тарафынан ҡуйылған төп бурыс ул.

Иптәш Сталин — практик эште ленинизмде өйрәнеү менән бергә бәйләп алып бармай торып, комсомолда күпме лә булһа мәғәнәле коммунистик эш алып барыу мөмкин түгел, тип ҡат-ҡат күрһәтте.

Иптәш Сталин комсомолдың һигеҙенсе съезында һөйләгән телмәрендә комсомолецтарҙы, йәштәрҙе фәнде өйрәнергә, ныҡышмалы һәм түҙемле рәүештә уҡырға саҡырҙы. «Беҙҙең алдыбыҙҙа крепость тора, — тине иптәш Сталин, — ул крепость күп һанлы белем тармаҡтары менән бергә фән тип атала... Әгәр ҙә йәштәр яңы тормош төҙөүселәр булырға теләйҙәр икән, әгәр улар ҡарт гвардияның ысын алмашсыһы булырға теләйҙәр икән, улар был крепосте алырға тейештәр».

Иптәш Сталин йәштәрҙе ауырлыҡтарға ҡаршы көрәштә, ҡыйынлыҡтарҙы еңеүҙә тәрбиәләргә өйрәтә. Комсомол, ти ул, әгәр ауырлыҡтарҙан ҡурҡа торған булһа, комсомол да булмаҫ ине.

Йәштәрҙең бурыстары тураһында, уларҙы тәрбиәләү тураһында Ленин менән Сталиндең биргән күрһәтмәләре комсомолға партия эше өсөн, коммунизм эше өсөн көрәштә етәксе программа булып тора.

Комсомол үҙенең күп тармаҡлы бөтә эшендә һәр ваҡыт партияның хәстәрле, юнәлеш биреүсе ҡулын һиҙә.

ВКП(б)-ның һигеҙенсе съезы «Йәштәр араһында эшләү тураһында» махсус ҡарар ҡабул итте. Был ҡарарҙа — «партияның революцион дәрт менән һуғарылған, намыҫлы һәм аҡыллы яңы работниктәр ала алырлыҡ яҡшы әҙерлекле резервтәре булырға тейеш», — тип әйтелә. Съезд, — йәштәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү өсөн кәрәкле иң күп һанлы үҙ алдына эшләүсе ойошма булғанда ғына, йәштәр араһында коммунистик эштең уңышлы барыуы мөмкин, — тип айырыуса билдәләне. Съезд партия ойошмаларын йәштәр союзына идея һәм материаль яҡтан иң эшлекле ярҙам күрһәтергә саҡырҙы.

Партияның 1922 йылдың апрелендә булған ун беренсе съезы йәштәр араһында эшләү тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Съезда яңы экономик политика шарттарында йәштәр союзы эшенең төп юнәлешен билдәләгән ҡарар ҡабул ителде. Съезд партия һәм комсомол ойошмаларының иғтибарын эшсе йәштәрҙең хеҙмәт һәм тормош шарттарын яҡшыртыу, йәштәр араһында культура эшен үҫтереү кәрәклегенә юнәлтте.

Унан һуң, 1923 йылдың апрелендә партияның ун икенсе съезында «Ойоштороу мәсьәләләре буйынса» резолюцияла партия ойошмаларының комсомолға етәкселеген бөтә саралар менән көсәйтеү кәрәклегенә яңынан айырыуса билдәләнелә. Съезд партия ойошмалары алдына йәштәр араһында эшләүгә «был иң мөһим эш тармағына ысынлап та иң тиклем талап ителһә, шул тиклем иғтибар һәм көс һалыу» бурысын ҡуйҙы. «РКСМ эше тураһындағы» ҡарарында съезд, комсомол революцион тәжрибәһе булмаған яңы йәштәр иҫәбенә яртылаш тиерлек артты, тип билдәләне. Шуға күрә комсомол алдына тәрбиә эшен көсәйтеү, «йәш быуын араһында фәнгә һәм техникаға ныҡлап эйә булыу ынтылышын» тыуҙырыу бурысы ҡуйылды. Съезд—бөтәһенән элек йәштәргә революцион көрәш тәжрибәһен бирергә һәм уны партия тарихы менән ентекләп таныштырырға кәрәк, тип иҫәпләне.

1924 йылдың майында партияның уң өсөнсө съезы йыйналды. Был, илдә дөйөм хужалыҡ күтәрелеше башланған һәм, шуның менән бергә, хужалыҡтың социалистик системаһы менән капиталистик системаһы араһында көрәш йәйелгән осор ине. Съезд комсомол алдына партия тарихын, уның программаһын һәм тактикаһын, уның ойоштороу принциптарын, Ленин тарафынан партияға ҡалдырылған бөтә идея мираҫын системалы рәүештә өйрәнеү бурысын ҡуйҙы. Партия комсомолдан культура, политик һәм хужалыҡ эштәрен бергә бәйләп алып барыуҙы талап итте.

ВКП(б)-ның 1925 йыл декабрь айында йыйылған уң дүртенсе съезы илде социалистик индустриализациялауға курс алды. Партия яңы шарттарҙа комсомолды яңынан ҙур күрһәтмәләр менән ҡоралландырҙы.

ВКП(б)-ның уң бишенсе съезы «Биш йыллыҡ план төҙөү буйынса директивалар тураһындағы» резолюцияһында социализм төҙөү эшендә партияның дәртле, боевой ярҙамсыһы булыуы яғынан комсомолдың актив ролен күрһәтте.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты «Хужалыҡ төҙөлөшөндә ВЛКСМ-дың ҡатнашыуы тураһында» 1929 йылдың декабрендә сығарған ҡарарында социалистик ярышта һәм ударсылыкта, урожайҙы күтәреү өсөн сығыш ойоштороуҙа комсомолдың тотҡан роленә, субботниктар үткәреүҙә комсомолдың күрһәткән инициативаһына юғары баһа бирҙе.

Партия Үҙәк Комитеты комсомол алдына хужалыҡ-культура төҙөлөшөнөң бөтә тармаҡтарында ҡатнашыуын бөтә саралар менән көсәйтеү бурысын ҡуйҙы. Комсомолецтар массаһын партияның генераль линияһынан һәр төрлө тайпылыуҙарға ҡарата большевистик килешмәүсәнлек рухында, уларға ҡаршы аяуһыҙ көрәшеү рухында сыныҡтырыу кәрәклеге айырыуса күрһәтелде.

Тыныс төҙөлөш йылдарында комсомол большевиктәр партияһының бөйөк ышанысын аҡлағанлығын бик күп данлы эштәре менән иҫбат итте. Илебеҙ тормошонда комсомолдың роле байтаҡ үҫте. Ошо айҡанлы, партияның уң һигеҙенсе съезы ВКП(б) Уставын ҡабул иткәндә уға «Партия һәм комсомол» тигән яңы бүлек индерҙе.

«ВЛКСМ бөтә государство һәм хужалыҡ төҙөлөшөндә партияның актив ярҙамсыһы булып тора, — тип әйтелә был бүлектә. — Комсомол ойошмалары социалистик төҙөлештең бөтә өлкәләрендә, бигерәк тә партия ойошмалары булмаған урындарҙа партия директиваларын ғәмәлдә актив рәүештә тормошҡа ашырыусылар булырға тейештәр», ВКП(б) Уставы комсомол ойошмаларына предприятиеның, совхоздың, учреждениеның эштәрен яҡшыртыу менән бәйләнгән бөтә мәсьәләләрҙе партия ойошмалары алдына ҡуйыу мөмкинлеген биреп, комсомол ойошмаларының хоҡуҡтарын киңәйтте.

Был хоҡуҡ комсомол ойошмалары алдына илебеҙҙең государство һәм хужалыҡ тормошонда тағы ла активыраҡ ҡатнашыу бурысын ҡуйҙы.

Гитлерсы Германияға ҡаршы Советтар Союзының Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Тыуған ил алдында күренекле хеҙмәттәре өсөн һәм совет йәштәрен Ватанға ысын күңелдән бирелгәнлек рухында тәрбиәләү буйынса ҙур эштәр эшләгәне өсөн Бөтә Союз Ленинсы Коммунистик Йәштәр Союзы Ленин ордены менән наградланды.

Ватан һуғышы совет йәштәренең һәм уның авангарды — комсомолдың рухани һәм физик сифаттарына ҡаты һынау булды. Комсомол был һынауҙы намыҫ менән үткәрҙе һәм бының менән ул бөтәһенән элек большевистик партияның һәм уның бөйөк юлбашсыһының тәрән аҡыллы етәкселеге алдында бурыслы.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты көндәлек эш барышында комсомол эшен хәстәрлек менән күҙәтеп бара, уға үҙенең күрһәтмәләре һәм кәңәштәре менән ярҙам итә, партия ойошмаларынан комсомолға иғтибар менән һәм уйлап етәкселек итеүҙе талап итә.

Иосиф Виссарионович Сталин комсомолға айырыуса иғтибарлы мөнәсәбәттә. Иптәш Сталин йәштәргә ҡарата һөйләгән һәм комсомолдың программ документтары булып әүерелгән үҙенең билдәле телмәрҙәренән һәм сығыштарынан тыш, комсомол етәкселәре менән күп тапҡырҙар осрашып, беседа яһаны.

Иптәш Сталиндең туранан-тура етәкселегендә, уның күрһәтеүҙәре буйынса ВЛКСМ-дың программаһы һәм Устав проекттары эшләнде; улар ВЛКСМ-дың уныңсы съезында ҡабул ителделәр. Программа һәм Уставтың төҙөү проекттарына иптәш Сталин тарафынан индерелгән төҙәтеүҙәр комсомолдың асылына тулы һәм асыҡ билдәләү, тәрбиә ойошмаһы булған уның эшенә юнәлеш һәм йөкмәтке бирҙе.

Партия комсомолды һәр ваҡыт революцион теорияға, Маркс—Энгельс—Ленин—Сталин учениеһына эйә булырға, кешелек донъяһы тарафынан йыйылған бөтә белем байлығын үҙләштерергә саҡыра һәм унда белем алыу дәрте уята. Партия комсомолды революцион көрәш закондарына өйрәтә. Унда — юғары мораль сифаттар — ғәйрәтлелек, ҡурҡа белмәү, ныҡышмалыҡ, большевистик принциплылыҡ сифаттары тәрбиәләй.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының идеологик эш мәсьәләләре буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙары һәм күргән саралары совет йәштәрен тәрбиәләү тураһында партияның һәм иптәш Сталиндең үҙенең хәстәрлек күреүҙәренең гүзәл шаһите булып тора.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты үҙенең ҡарарҙарында, беҙҙең әҙәбиәтебеҙ, искусствобыҙ йәш быуынды юғары идеялы, уяу, үҙ эшенә ышаныс менән ҡараусан, үҙ Тыуған илен һөйөүсе, Ленин—Сталин идеяларына бирелгән һәм ныҡлы итеп тәрбиәләүҙә партияға һәм Совет государствоһына ярҙам итергә саҡырылған, тип хәтергә төшөрөп килде.

ВКП(б) Үҙәк Комитетының ҡарарҙары комсомолдан йәштәр араһында бөтә идеологик эште киҫкен рәүештә күтәреүҙе талап итә.

ВЛКСМ Уставы комсомолецты «большевиктар партияһының ҡарарҙарын үтәргә... илдең политик тормошонда актив ҡатнашырға» мәжбүр итә. Партияның ҡарарҙары — комсомолец өсөн закон, партия эше—бөтәһенән дә өҫтөн. ВЛКСМ-дың һәр бер члене үҙен һәр ваҡыт партия директиваларын масса араһына үткәреүсе итеп, партияның генераль линияһын тормошҡа ашырыу өсөн актив көрәшсе итеп аңларға тейеш.

Партия, иптәш Сталин комсомолға уның бөтә эшендә юнәлеш бирҙеләр. Үҫеп килеүсе йәш быуынды большевистик партияға бирелгәнлек рухында тәрбиәләү эшен уңышлы рәүештә дауам иттереү, йәштәргә фән һәм культураға эйә булырға ярҙам итеү, йәштәрҙе Тыуған илебеҙҙе артабан сәскә аттырыу өсөн көрәшкә күтәреү — комсомолдың бурыстары бына ошо. Комсомол ойошмаларының бөтә көстәре ошо бурыстарҙы хәл итеүгә юнәлтелгән.

А. Юрьев.

Үҙ вәғәҙәләрен намыҫ менән үтәрҙәр

«Туймазынефть» тресының беренсе номерле бораулау контораһындағы комсомол ойошмаһы Октябрьск ҡалаһында иң ҙур ойошмаларҙан иҫәпләнә. Йыл башында ойошмала 45 комсомолец бар ине. Хәҙер уларҙың һаны 65-кә етте. Йәштәрҙең Ленин комсомолы сафына инергә ынтылышы ҙур. Соңғы комсомол ойошмаһы нефтсе йәштәрҙең политик ойоштороусыһы, социалистик ярыштың, тиҙләтелгән метод менән бораулауҙың, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн көрәштең инициаторы булып тора. Шуға күрә лә, производствола комсомолдың роле көндән-көнгә күтәрелә бара.

Комсомол ойошмаһының асыҡ йыйылышында комсомолецтар һәм союздан тыш йәштәр 1948 йыл планын Ленин комсомолының 30 йыллығы көнөнә үтәргә ҡарар иттеләр. Йәштәр хәҙер үҙ вәғәҙәләрен үтәү өсөн намыҫ менән көрәшәләр. 1948 йыл нормаһын ВЛКСМ-дың 30 йыллығы көнөнә 150 процентҡа үтәргә йөкләмә алған комсомолец-токарь Рыбаков ай һайын нормаһын 150—175 процентҡа еткереп үтәй. Комсомолец-слесарь Иҫәнгилдиев, буровик Зверев иптәштәр нормаларын систематик рәүештә 150—200 процентҡа үтәп киләләр.

Бораулау мастеры иптәш Алексеев етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы гүзәл уңыштарға өлгәште. Ул бораулау эшен 15 мартта башланы һәм 9 майға, план менән билдәләнгән 757 метр урынына, 1192 метр бораулап, нормаһын бик күпкә арттырып үтәне. Бригада план буйынса станок-айға 435 метр урынына 705 метр тиҙлегендә бораулай. Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу, техник тиҙлекте күтәреү һәм тиҡ тороуҙарҙы бөтөрөү арҡаһында комсомолец-йәштәр бригадаһы билдәләнгән нормаларҙы арттырып үтәүгә өлгәште.

Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү, эштәге етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү буйынса труба базаһындағы һәм механик мастерскойҙағы цех комсомол группалары байтаҡ эштәр башҡарҙылар. Шулай итеп, комсомолецтар социалистик ярышта алда баралар, ырамлы эшләүҙең һоҡландырғыс өлгөләрен күрһәтәләр.

Йәш нефтселәр Ленин комсомолының 30 йыллыҡ юбилейына достойно булырлыҡ производство бүләктәре әҙерләйҙәр.

С. Ғәлимова.

1948 йылдың май айында валовой продукция эшләп сығарыуҙың государство планы үтәлеше йомғаҡтары тураһында СССР Госпланының

Башҡорт АССР-ы буйынса Уполномоченныйы белдереүе

1948 йылдың май айында Башҡорт АССР-ының бөтә промышленносе валовой продукция эшләп сығарыу буйынса планды 101 процентҡа үтәне.

Башҡорт АССР-ы промышленносеның валовой продукцияһы 1948 йылдың май айында, 1947 йылдың май айына сағыштырып алғанда, 22 процентҡа үҫте.

Валовой продукция эшләп сығарыу планын 350 самаһы предприятие үтәне һәм арттырып үтәне, улар иҫәбендә:

Өфө нефть эшкәртеү заводы, «Туймазынефть» тресы, тау оборудованиелары заводы, Ишембай нефть эшкәртеү заводы, Благовещендәге нефть оборудованиелары заводы, Сталин исемендәге завод, Белорет металлургия комбинаты, резина промышленносе заводы, Ворошилов исемендәге аяҡ кейемдәре тегеү фабрикаһы, Мәләүездәге ҡоро һөт заводы, витамин заводы, яҙыу машиналары заводы, суднолар ремонтлау заводы һәм башҡалар.

1948 йылдың май айында планды үтәмәгән предприятиелар иҫәбенә:

«Ишембайнефть» тресы, Белорет ҡорос-сыбыҡ заводы, Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводы, «Альшейуголь», Урман промышленносе Министерствоһының леспромхоздары һәм башҡалар инәләр.

1948 йылдың май айы планын, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы ведомствоһында булған предприятиелар 94 процентҡа үтәнеләр. Шул иҫәптән: төҙөү материалдары промышленносе управлениеһы 125 процентҡа, Еңел промышленность Министерствоһы 107 процентҡа, урындағы промышленность Министерствоһы 99 процентҡа, Аҙыҡ промышленносе Министерствоһы 80 процентҡа, урындағы яғыулыҡ промышленносе управлениеһы 74 процентҡа, Урман промышленносе Министерствоһы 40 процентҡа үтәне.

Промысловой кооперациялар май айы планын 95 процентҡа, инвалидтар кооперацияһы 62 процентҡа үтәне.

СССР Госпланы Уполномоченныйы.

Коммунистәрҙе идеологик тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирелә

ВКП(б)-ның район, ҡала һәм өлкә конференциялары коммунистәрҙе идеологик яҡтан тәрбиәләүгә ҙур әһәмиәт бирҙе. Агрегат заводының партия ойошмаһы етәкселәре конференция ҡарарынан үҙҙәренә ҡарата тейешле һығымта яһанылар. Улар партия уҡыуҙарын ойоштороуҙағы етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн һис киҫекмәҫтән практик эшкә тотондолар. Партия ойошмаһында учетта торған бөтә коммунистәр ҙә партия уҡыуы селтәре эсенә алындылар. 9 коммунист ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты эргәһендә киске университетта уҡый. Завод партия ойошмаһы ВКП(б) тарихын түңәрәктәрҙә өйрәнеү эшен конференциянан һуң яңынан ҡарап сыҡты. Бөгөнгө көндә бөтәһе 8 түңәрәк эшләй. Был түңәрәктәргә 132 коммунист йөрөй.

Конференцияның, бигерәк тә, партия һәм хужалыҡ эшендә эшләүсе активтең уҡыуына ныҡ әһәмиәт бирергә кәрәк, тигән ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн завод партия ойошмаһы партия активе өсөн теоретик семинар һәм экономиканы өйрәнеү семинарҙары ойошторҙо. Был семинарҙар заводта булған бөтә активте эсенә ала.

Завод партия ойошмаһының 39 коммунисы большевистик партияның тарихын һәм теорияһын үҙ алдына өйрәнә. Ике ай эсендә заводтағы эшселәр һәм инженер-техник работниктәр өсөн 13 лекция һәм доклад үткәрелде. Лекция һәм докладтарҙың күбеһен завод партия ойошмаһы секретары Журавлев, завод директоры Советов, заводтың баш инженеры Максимов иптәштәр үҙҙәре яһанылар.

ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү өсөн төҙөлгән түңәрәктәрҙең етәкселәре итеп теоретик яҡтан яҡшы әҙерлектәре булған Гельченко, Руднев, Егоров, Михайлов һәм башҡа иптәштәр билдәләнделәр. Улар түңәрәктәрҙең эшенә план төҙөп, занятиеларҙы планлы рәүештә алып баралар, үҙҙәре яҡшы әҙерләнәләр. Бына мәҫәлән, түңәрәк етәксеһе иптәш Егоров 1948 йылдың ике айы эсендә генә 11 занятие үткәрҙе. Хәҙергә көндә ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсының III главаны өйрәнеүҙе тамамлап, IV главаны өйрәнеүгә күсте. Иптәш Егоров занятиеға үҙе ҙур әҙерлек менән килә. Ул үҙе ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин әҫәрҙәрен дә өйрәнә. Ул һуңғы ике ай эсендә генә Лениндең «Нәмә эшләргә?», «Бер аҙым алға, ике аҙым артҡа», «Демократик революцияла социал демократтарҙың ике тактикаһы» тигән әҫәрҙәрен, Сталиндең «Ҡоралды восстание һәм беҙҙең тактика» тигән әҫәрен өйрәнгән. Иптәш Егоров занятие үткәргәндә художестволы әҙәбиәтте лә файҙалана. Ул түңәрәк члендарына партия тарихының өсөнсө главаһын өйрәткәндә Степановтың «Порт-Артур» тигән китабынан, Максим Горькийҙың «Әсә» тигән китабынан өҙөктәр килтерҙе. Был, занятие барышын йәнләндерергә, үтелә торған теманы ныҡлап үҙләштерергә мөмкинлек бирә. Түңәрәк занятиелары йәнле беседа һәм иптәштәре дискуссия методы менән алып барыла. Занятие ҡыҙыҡлы һәм теоретик яҡтан юғары кимәлдә үтә. Шуға күрә лә түңәрәк члендары занятиеларға ҙур ҡыҙыҡһыныу менән йөрөйҙәр һәм алдан әҙерләнеп киләләр. Түңәрәктә булған 22 кешенең барыһы ла I, II, III главанан конспект төҙөгәндәр. Түңәрәк члендарынан Юнысова, Стрелкова, Данде һәм башҡа иптәштәр занятиеларҙа айырыуса актив ҡатнашып, үҙ сығыштарында материалдың эстәлеген яҡшы итеп һөйләп бирәләр. Был түңәрәктә занятиеға йөрөү ҙә яҡшы. Һәр занятиела 22 кешенән 19—20 кеше ҡатнаша.

Завод партия ойошмаһы конференциянан һуң марксизм-ленинизм теорияһын үҙ алдына өйрәнеүселәрҙең эшенә ҙур иғтибар бирә башланы. Үҙ алдына өйрәнеүселәргә ярҙам итеү, уларҙың эшен ойоштороу, эштәренә контроль яһау өсөн теоретик яҡтан яҡшы әҙерлекле Нагорный, Чикунов, Журавлев иптәштәр партия ойошмаһы тарафынан консультант итеп билдәләнделәр. Был иптәштәрҙең һәр ҡайһыһына үҙ алдарына өйрәнеүселәрҙән айырым группа беркетелде. Улар систематик рәүештә үҙҙәренә беркетелгән иптәштәр менән эш алып баралар, консультацияларға саҡыралар, индивидуаль беседалар үткәрәләр, үҙ алдарына өйрәнеүселәрҙең эштәрен планлаштырыуға ярҙам итәләр.

Шуға күрә лә үҙ алдарына эшләүселәр систематик рәүештә белемдәрен арттыралар. Бына йәш коммунист иптәш Шилов 1948 йылдың февралендә генә ВКП(б) тарихының ҡыҫҡаса курсын үҙ алдына өйрәнә башланы. Хәҙер ул IV главаны өйрәнеүгә күсте. Был иптәш консультант Нагорныйға беркетелгән. Иптәш Нагорный айына кәмендә ике тапҡыр үҙенә беркетелгән иптәштәр менән беседа үткәреп, уларға тейешле күрһәтмәләр бирә. Өйрәнгән материалдарының эстәлеге буйынса собеседование үткәрә. Шуның өсөн дә иптәш Шилов партия тарихының төп мәсьәләләрен яҡшы үҙләштергән. Үтелгән һәр бер глава буйынса конспект төҙөгән.

Агрегат заводының партия ойошмаһында бындай коммунистәр күп. Улар араһында 1-се бүлек начальнигы Иванов, техник Нефедов, Петров һәм башҡа иптәштәр бар.

Завод партия ойошмаһында партия уҡыуҙарының юғары сифатлы итеп ҡуйылыуы партия ойошмаһы етәкселәренең, ғөмүмән партия активының марксизм-ленинизм теорияһын өйрәнеү тураһында һүҙ алып барыу менән генә сикләнмәйенсә, ныҡышмалы рәүештә практик эш алып барыуҙарына бәйләнгән. Завод партия ойошмаһы секретары иптәш Журавлев үҙе Лениндең бер нисә әҫәрен өйрәнгән. Хәҙер ул Лениндең «Нәмә эшләргә?» тигән әҫәре өҫтөндә эшләй. Ул йыш ҡына теоретик һәм политик темаларға лекциялар уҡый, докладтар яһай.

Партия уҡыуҙарын ойоштороуҙа завод партия ойошмаһының етешһеҙлектәре лә бар. Ҡайһы бер түңәрәктәрҙә занятиеларға йөрөү ҡәнәғәтләнерлек түгел. Заводтың ярҙамсы хужалығында эшләүсе коммунистәр үҙҙәренең теоретик белемдәрен арттырыуҙа систематик рәүештә эшләмәйҙәр әле. Был етешһеҙлектәрҙе лә бөтөрөргә завод партия ойошмаһының бөтә мөмкинлектәре бар. Тик партия уҡыуҙарын ойоштороуҙа тағы ла ныҡыраҡ эшләргә генә кәрәк.

А. Нәсибуллин,
ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты инструкторы.

Малсылыкты үҫтереү планын һәр бер колхоз буйынса үтәргә!

Йорт куяндары һәм йәнлектәр үрсетәйек

Йорт куяндары һәм йәнлектәр үрсетеүҙең халыҡ хужалығында әһәмиәте ҙур. Ул малсылыҡтың ҙур доход биреүсе бер тармағы. Шуға күрә лә партия һәм хөкүмәт колхоздарҙа йорт куяндары һәм йәнлектәр үрсетеүгә ҙур иғтибар итәләр. Хөкүмәт ҡарары нигеҙендә государствоға йорт куяндары продуктылары һәм йәнлек тиреләре тапшырған колхоздарға ҙур льготалар бирелә.

Ағымдағы йылда республикабыҙҙа йорт куяндарының һаны 14 меңгә һәм ҡара төлкөләр һаны 330-ға еткерелергә тейеш. Һәр бер колхозда хужалыҡтың был тармағын үҫтереүгә тулы мөмкинлектәр бар. Мәҫәлән, Өфө районы «Труд» колхозында иптәш Филиппов быйыл өс төлкөнән 13 бала алып, уларҙы тулыһынса һаҡлап үҫтерҙе. Бүздәк районы «Урта юл» колхозында йорт куяндары тәрбиәләүсе иптәш Ҡодаярова үҙенә беркетелгән 60 баш инә куяндан 580 куян балаһы алды.

Ләкин күпселек районларҙа һәм колхоздарҙа был яңы тармаҡты үҫтереүгә тейешле иғтибар бирмәйҙәр әле. Маҡар районы был өлкәлә бигерәк тә артта ҡала. Районның етәксе ойошмалары колхоздарҙың ярҙамсы хужалыҡтарын үҫтереүтә һәр яҡлап булышлыҡ итәһе урында, ундай ваҡ-төйәк эш менән шөғөлләнергә ваҡыт та, средство ла юҡ, тиган һылтау менән, районға ебәрелгән төлкеләрҙе алыуҙан бөтөнләй баш тарттылар.

Туймазы районы «Сулпан» колхозында мамыҡ биреүсе ангор тоҡомло бик яҡшы йорт куяндары аҫырайҙар. Ләкин уларҙы тәрбиәләүгә һәм үрсетеүтә тейешле иғтибар бирелмәй. Ул хужалыҡтан ҙур доход алыу урынына, колхоз был куяндарҙы аҫырау өсөн ҙур расход ҡына тота. Үҙған йыл куяндарҙан 25 килограмм урынына, ни бары 3 килограмм мамыҡ алынды.

Ҡуянсылыҡ һәм йәнлекселек эшендә зоотехниктәр, ветврачтар бик аҙ ярҙам итәләр. Шул сәбәпле аҙ ғына ауырыуҙар ҙа, ваҡытында тейешле сара күрелмәгәнлектән, бик күп йорт куяндарының һәм йәнлектәрҙең һәләк булыуына килтерә. Күпселек колхоздарҙа уларҙы аҫырау өсөн махсус торлаҡтар юҡ.

Колхоздарҙа ҡуянсылыҡты һәм йәнлекселекте рентабелле итеү өсөн, иң беренсенән, район ауыл хужалығы бүлеге работниктәре һәм колхоз етәкселәре был эшкә булған ҡараштарын тамырынан үҙгәртергә, һуғышҡа тиклем йәшәп килгән бөтә фермаларҙы аяҡҡа баҫтырырға һәм яңыларын ойоштороорға тейештәр.

Г. Копченов,
БАССР Ауыл хужалығы Министрлығының өлкән зоотехнигы.

Йылҡысылыҡ алдынғыларына государство премиялары бирелде

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы республикабыҙҙың колхоздарында малсылыҡ үҫтереү буйынса 1947 йылғы социалистик ярыш йомғаҡтарын ҡараны. Йылҡысылыҡ буйынса иң яҡшы күрһәткестәргә өлгәшкән өсөн БАССР Министрҙар Советы дипломдарын һәм 1000 һум күләмендә государство премияларын түбәндәге колхоз председателдәренә, йылҡысылыҡ фермалары мөдирҙәренә бирергә ҡарар итте.

Бөрө районы буйынса: «Эрикбий» колхозы председателе **А. Я. Альбеков**, «Новый путь» колхозы председателе **И. М. Желонкин** иптәштәргә.

Архангель районы буйынса: Калинин исемендәге колхоз председателе **И. Г. Ширяев** иптәшкә.

Бишбүләк районы буйынса: «Ибрайкино» колхозы председателе **К. Б. Бикметов**, «Малалла» колхозы председателе **З. В. Никитин**, «Красная поляна» колхозы председателе **Д. Х. Тепляков** иптәштәргә.

Учалы районы буйынса: «Марс» колхозы председателе **Н. Я. Насиров**, «Ҡарағас түбә» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **Ғ. Кинйәморатов** иптәштәргә.

Белоҡатай районы буйынса: «3-я пятилетка» колхозы председателе **А. П. Южанин**, «Завет Ильича» колхозы председателе **Г. Г. Ермолаев** иптәштәргә.

Благовар районы буйынса: «Ҡыҙыл ярыш» колхозы председателе **М. Ә. Хамматов**, «Моряк» колхозы председателе **И. Ф. Шкурун**, Киров исемендәге колхоз председателе **А. Г. Печко** иптәштәргә.

Федоровка районы буйынса: «Новая жизнь» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **В. В. Маковлев**, «Сулпан» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **Ғ. Н. Ғәлиев** иптәштәргә.

Байҡыбаш районы буйынса: «Победа» колхозының председателе **О. М. Зязев**, «Алға !» колхозы председателе **Ф. С. Сәғитдинов**, «Совет» колхозы председателе **Ә. Ш. Шәйхетдинов** иптәштәргә.

Әбйәлил районы буйынса: Сталин исемендәге колхоздың йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **С. Н. Сидоров**, «Большевик» колхозы председателе **Ғ. Х. Хөснәтдинов**, «Серп и молот» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире **И. П. Извеков** иптәштәргә.

Йомағужа районы буйынса: «Сеятель» колхозы председателе **И. А. Дубас**, «7-се ноябрь» колхозы председателе **З. К. Хәмидуллин** иптәштәргә.

———☆———

Һаҡмағош районы колхоз фермаларында

Һаҡмағош районы колхоздары быйыл общественный малсылыҡты үҫтереүҙә уңышлы ғына эшләйҙәр. 1948 йылдың 4 айы эсендә йылҡыларҙың һаны 8,4 процентҡа, мөгөҙлө эре малдар — 10,6, сусҡалар — 47 процентҡа артты. Хәҙер ҙә эш яҡшы бара. Йәш малдар алыуға һәм тәрбиәләүгә айырыуса иғтибар бирелә. Шуның һөҙөмтәһендә быйыл алынған ҡолондар бөтәһе лә һау-сәләмәт тәрбиәләнәләр.

Күп кенә колхоздар малсылыҡты үҫтереүҙең йыллыҡ планын үтәнеләр инде. «Комбайн» ауыл хужалығы артеле (ферма мөдире иптәш Сухов) районда иң беренсе булып бөтә төр малдар буйынса планды арттырып үтәүгә өлгәште. Уға район Советының һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағы бирелде.

«Боғдан», «Ударник», «Йөрәк тау», Ворошилов һәм башҡа колхоздар ҙа малсылыҡты үҫтереү буйынса яҡшы эшләйҙәр. Улар ферма яңы участкаларҙа мал аҙығы сәсеү планын арттырып үтәнеләр. Махсус бригадалар мал торлаҡтары төҙөү һәм ремонтлау менән шөғөлләнәләр. Хәҙер күпселек колхоздарҙа бесән сабыуға әҙерлек тамамланып килә.

И. Кәримов.

———☆———

Государствоға малсылыҡ продуктылары тапшырыу планын өҙәләр

Маҡар районы ошо йылдың беренсе кварталында государствоға малсылыҡ продуктылары тапшырыу планын өҙҙө.

Районның колхоздары икенсе кварталда ла был өлкәлә тейешле һыҙылыш яһамаһылар.

Әҙерләүҙәр Министрлығының район вәкиле Иблев һәм район Советы исполкомы председателе Солтанов иптәштәр тарафынан был мөһим эшкә конкрет етәкселектең булмауы районда малсылыҡ продуктылары тапшырыу планын хурлыҡлы рәүештә өҙөүгә килтерҙе. «Ҡыҙыл байраҡ», Карл Маркс исемендәге колхоздар 1948 йыл өсөн ошо көнгә тиклем бер килограмм да ит тапшырғандары юҡ. «Большевик», «Берҙәм», «Ҡыҙыл партизан» ауыл хужалығы артелдәренең председателдәре Хәйбуллин, Мөхәмәтъянов иптәштәр ҙә ошо көнгә тиклем государство алдындағы йөкләмәләрен үтәүгә башламағандар. Был колхоздарға беркетелгән Уполминзаг агенте иптәш Ғафаров үҙендә бер ниндәй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәй. «Гора», «Ирк» колхоздарында ла государствоға малсылыҡ продуктылары тапшырыу бик аҡрын бара.

С. Сәйфуллин.

КУЛЬТУРА ТОРМОШО ХРОНИКАНЫ

„Октябрь“ журналы конкурсы

Башҡортостан Совет языусылары Союзы органы «Октябрь» журналы, драма түңәрәктәре, колхоз һәм предприятие клуб сәхнәләре репертуар менән тәьмин итеү маҡсатында, бер шаршаулыҡ сәхнә әҫәрҙәренә конкурс иғлан итте. Конкурстың срогы 1949 йылдың ғинуарына тиклем. Яҡшы тип табылған пьесалар, август айынан башлап, журналда баҫылып сыға барасаҡ.

Конкурс асыҡ. Унда, профессионал языусылардан тыш, әҙәбият менән ҡыҙыҡһыныусы бөтә кешеләр ҙә ҡатнаша алалар. Әҫәрҙең күләме 1,5 табаҡтан артмаҫҡа тейеш. Шулай уҡ ҡуляҙмаларҙың асыҡ итеп, ҡағыҙҙың бер яғына ғына яҙылған булыуы йәки машинкала баҫылыуы талап ителә.

Иң яҡшы табылған пьесаларға түбәндәге премиялар ҡуйылды: бер премия — баҫылған пьесаға түләнәсәк гонорарҙың тулы һәм ике премия түләнәсәк гонорарҙың ярты суммаһы күләмендә.

———☆———

„Айбәк“ операһы кабул ителде

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге Искусство эштәре Управлениеһе ҡаршында төҙөлгән комиссия ошо көндәрҙә композитор Р. Мортазиндең «Айбәк» операһын ҡабул итте. Опера һәм балет театрының солистәре операның төп партияларын башҡарып күрһәттеләр.

Тыңлап сығыу һуңында, операға юғары баһа бирелде. Айырыуса Айбәк, Ҡарасәс, Солтан арияларҙы, балет һәм ансамбль сәхнәләре тәрән тойғо ҡалдыралар. Р. Мортазин, бығаса башҡорт опера искусствоһында булған кеүек, халыҡ көйҙәрен эшләп сығыу юлынан китмәгән, тулы баһалы һәм ҙур үҙенсәлекле әҫәр тыуҙырған.

Опера, ҡайһы бер ваҡ музыкаль төҙәтмәләрҙән һуң, сәхнәгә ҡуйыласаҡ. Театр операны Башҡортостандың XXX йыллығына әҙерләүҙе күҙҙә тота.

———☆———

Чкалов театры Өфөлә

Чкалов ҡалаһының музыкаль комедия театры йәйге гастролдәргә Өфөгә килде. Театр, 11 июнда, Сталин премияһы лауреаты И. Дунаевскийҙың «Иркле ел» тигән дүрт шаршаулыҡ опереттаһы менән эшкә башланы. Икенсе спектакль итеп Бирмдендең «Мариондың туйы» исемле музкомедияһы әҙерләнә.

Чкалов музыкаль комедия театры, гастролдәр осоронда, Өфө халҡына 18 исемдә спектаклдәр күрһәтәсәк.

Почетлы радист

Ул Бөйөк Ватан һуғышы инвалиды. Уның уң аяғы юҡ—протез. Һул аяғы ғарипләнгән, ҡыҫҡарып ҡалған. Уң ҡулбашы имгәнгән. Башында йәрәхәт бар. Шулай булғас инде «был кеше бөтөнләй эштән сыҡҡан» тип һәр кемдең уйлауы мөмкин ине. Уға инде бер генә юл: үҙенә аямыш ҡулына тапшырып, ҡалған ғүмерҙе Өфө ҡалаһының квартираһында тып-тын ғына мәйешоп да үткәреү ҡарҡ һымаҡ тойола ине.

Ләкин Кәүсәр Баншев яҙмышҡа бирелергә уйламаны: «Мин тере. Һәм мин үҙемдең специальносемде — радистлеге яратам. Минең сәләмәт ҡалған һул ҡулым бар. Шулай булғас, әле мин файҙалы кеше була алам», — тип үҙен-үҙе йыуатты.

...Һуғыш бөткәс Баншев үҙенең тыуған ҡалаһына — Өфөгә ҡайтты ла эшкә тотондо. Ул иҫке радиоприемник табып алды. Уны эфирҙән тулҡындарҙы тотоуға ҡулайлаштырҙы. Шунан һуң ул төндәрҙе эфирҙә сыға башланы. Кәүсәр Баншев көндән-көн менән һөйләшеүҙе тыңлап, аппарат янында төндәр буйы ултыра.

Бер ваҡыт ута-атаҡлы радист, Советтар Союзы Геройы Эрнст Теодорович Кренкелдең сит ил радио һөйәүсеһе менән хәбәрләшеүен тоторға тура килде. Кәүсәр Баншев һөйләшеүҙе тыңлап бөткәндән һуң, үҙенең радиожурналын асып, был ваҡиғаны яҙып ҡуйҙы.

Ул шулай, бер йыл буйына, эфирҙа һөйләшеүҙәрҙе тотоу менән шөғөлләнде. Совет һәм сит ил радио һәүәскәрҙәренең ҡыҫҡа тулҡынлы аппарат аша һөйләшеүҙәрен тыңланы. Ләкин үҙе һөйләшә алманы — уның аппараты тик ҡабул итә генә, ә тапшыра алмай ине.

Бына һуң Кәүсәр связь ғәскәрҙәре маршалы иптәш Пересыпкинға хат яҙа. Хатында радист ҡыҫҡаса биографияһын хәбәр итә. Унда: 1925 йылдан башлап, радио эше менән ҡыҙыҡһынғанлығы, 1931 йылда Ленинградта диңгеҙ училищеһен тамамлағанлығы һәм бер йылдар дауамында Балтик диңгеҙе флотындағы караптарҙа радист булып эшләй башлауын яҙа. Ул бик күп экспедицияла ҡатнашҡан. Ватан һуғышының беренсе көндәренән уҡ фронтҡа китә. Башта Армия радиоузеленең начальнигы булып, унан һуң генерал-полковник Чуйков армияһында хеҙмәт итә. Сталинградты һаҡлауҙа ҡатнаша.

Һуғыштан һуң беренсе группа инвалид булып өйөнә ҡайта. Радио эшен дауам иттереүе килә. Ләкин радио тапшырыу станцияһы юҡ.

Маршал Пересыпкин уға, ҡабул итеү-тапшырыу радиостанцияһын ебәрәсәген хәбәр итә. Һәм 1947 йылдың 4 ноябрендә Кәүсәр Баншев ҙур түҙемһеҙлек менән көткән радиостанцияны алыу бәхетенә өлгәшә.

Икенсе көндө уҡ радиостанция эшләй башлай. Кәүсәр Баншев үҙенең саҡырыу билдәһен эфирға тарата. Күп тә үтмәй, ул Мәскәү, Ленинград, Киев, Горький, Свердловск ҡалаларының ҡыҫҡа тулҡында эшләүселәре менән һөйләшә. Унан һуң ул Польша, Болгария, Чехословакия, Югославия, Швеция, Голландия, Бельгия, Франция, Англия һәм башҡа илдәрҙәге радио һәүәскәрҙәре менән һөйләшә.

Бынан бер нисә көн элек, Кәүсәр Баншев Европаның төрлө илдәренән күсәлә-открыткалар ала. Был открыткалар уның сит ил радио һәүәскәрҙәре менән ысынлап та һөйләшкәнлеген дөрөҫләйҙәр.

Иптәш Баншев 7 ай эш осоронда 300-ҙән артыҡ радио һәүәскәрҙәре менән һөйләшеүгә ирешә. Ул хатта, Палестина һәм Америка радистары менән бәйләнеш тотоуға өлгәшә.

Кәүсәр Баншев, хәҙерге көндә, радиоаппаратураһын камиллаштереү өҫтөндә эшләй. Ул радионың универсаль улсау приборҙарын йыйыны. Үҙенең аппаратураһын даими ток менән эшләүҙән переменный токҡа эшләүгә күсерә.

СССР-ҙың Ҡоралы Көстәре Министре, Советтар Союзы маршалы иптәш Булганин Кәүсәр Баншевҡа «Почетлы радист» значогы менән наградланы. Был наградаға партия члены, атаҡлы һәм күпте күргән радист Баншевты, радио эшенә тағы ла ныҡлыраҡ тотонорға рухландыра.

Һүрәттә: Р. Баншев.

С. Арсеньев тексы.
Е. Пряжевский фотоһы.

Яҡшы аттар үҫтереүселәр

Республикабыҙҙың Урал арты райондарында йылҡы үрсетеү элек-электән көтөүҙәрҙә алып барыла. Был тәртипте ҡулланған колхоздар йыл һайын юғары күрһәткестәргә өлгәшәләр.

Был райондарҙа йылҡыларҙы көтөүҙәрҙә аҫырау ни тиклем кинерәк ҡулланылһа, һәр бер 100 бейәнән ҡолон алыу дәрәжәһе лә шул тиклем юғары. 1947 йылда Учалы районында көтөүҙә тәрбиәләүгә 2000 бейә бүленгәйне. Бында һәр бер 100 бейәнән ҡолон алыу, республикала уртаса алыныуға ҡарағанда, 22 башҡа артыҡ булды. Йылҡы үрсетеүсе мастерҙарҙан Мортаза Алтынов һәм Ғәлимнур Кинйәморатов иптәштәр айырыуса ҙур уңыштарға ирешеп киләләр.

Мортаза Алтынов — «Өргән» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире. Был ферма һуңғы 5 йылда йыл һайын көтөүҙә йылҡы үрсетеү буйынса государство планын арттырып үтәп килә. Ул 1947 йылда йылҡы һанын план буйынса 155 урынына, 167 башҡа еткереп, планды 107 процентҡа үтәне. 22 ҡолон урынына, 39 ҡолон алды, план 122 процентҡа үтәлде. Был өлгәшеүҙәре өсөн иптәш Алтыновҡа 1000 һум күләмендә государство премияһы һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының дипломы бирелде.

Ә Ғәлимнур Кинйәморатов — «Ҡарағас түбә» колхозының йылҡысылыҡ фермаһы мөдире. Ул да шундай уҡ премия һәм диплом алды. Йылҡы үрсетеүҙең 1947 йылғы планын 106,3 процентҡа үтәне.

Был районның шулай уҡ «Марс» һәм «Большевик» колхоздары ла йылҡысылыҡты үҫтереүҙә яҡшы уңыштарға ирештеләр. «Марс» колхозы председателе иптәш Нур Насиров йылҡы үрсетеүҙең йыллыҡ планын 110, ә ҡолондар буйынса планды 183 процентҡа үтәүгә өлгәшеүе өсөн 1000 һум күләмендә аҡсалата премия һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының дипломын алды.

Әбйәлил районының «Серп и молот» һәм Сталин исемендәге колхоздары ла йылҡысылыҡты алға ебәреүҙә яҡшы эшләйҙәр.

Сталин исемендәге колхозда 1944 йылда 88 баш йылҡы малы бар ине. Өс йыл ярым ваҡыт эсендә бында йылҡы һаны 155 башҡа етте. 1945 йылда 25 бейәнән 25 ҡолон, 1946 йылда 30 бейәнән 27 ҡолон һәм 1947 йылда 30 бейәнән 30 ҡолон алып үҫтерелде. Тимәк, бында һуңғы 3 йыл эсендә һәр бер 100 баш бейәнән 90-шар ҡолон алынды тигән һүҙ.

Бында бөтә йылҡы малы көтөүҙә тәрбиәләнә. Тик ваҡ малдар ғына тәүге йылда көтөүгә сығарылмайҙар. Улар бер йәшкә тиклем бейәләр менән бергә, ферма янында тәрбиәләнәләр. Ә ҡәҙ һалҡындар башланыу менән, ҡолондар һеттән айырылалар һәм торлаҡ шарттарындағы тәрбиәгә күсереләләр.

Йылҡы фермаһының көтөүлек майҙаны 400 гектар, һәр бер йылҡыға 3-әр гектар ер тура килә. Көҙ көнө көтөүҙәр урожайы йыйналып алынған баҫыуҙарға күсереләләр. Бында улар ҡышҡы тибенгә сығыуға тиклем ныҡ уҡ һимерәләр. Шулай уҡ был маҡсат өсөн кәбән һәм эҫкерттәре ташылып алынған болонлоҡтарҙағы ҡурпылар ҙа киң рәүештә файҙаланыла.

Фермала малдың тоҡомон яҡшыртыуға ҙур иғтибар бирелә. Йылҡы малдарын көтөүҙә һәм тибендәрҙә тәрбиәләү уларҙың бөтә шарттарға сыҙамлы булыуҙарын талап итә. Малдың тоҡомон яҡшыртыу эше лә бына ошо талаптар нигеҙендә алып барыла. Ферманың хәҙер башҡорт тоҡомло 24 баш йылҡыһы бар. Шул иҫәптән: бейәләр 10, айғыр—1 һәм ваҡ мал—13 баш. Яҡшыртылған донбашҡорт тоҡомло йылҡылар 94 баш. Шул иҫәптән: айғыр бер, бейәләр 31 һәм ваҡ мал 62 баш.

Фермала төп тоҡом айғыры булып, башҡорт тоҡомло бер айғырҙан тыш, башҡорт аттарының тип һәм сифаттарын байтаҡ һаҡлаған «Ласковый» исемле ҡола айғыр һанала. Уның ҡан таҙалығында дон тоҡомо сифаттары ла һәм башҡорт тоҡомо сифаттары ла бар. Колхозсылар тоҡом айғырының артабан тоҡом ҡаны үҙгәреүен кәрәкле тип һанамайҙар. Уларҙың был фекерҙәре бик урынлы. Быны күрше колхоздарҙағы фактылар дөрөҫләй. Мәҫәлән, Салауат батыр исемендәге колхозда элек яҡшы күрһәткесле тоҡом айғырҙары бар ине. Ләкин йәш малдарҙың ҡаны 2-се генерацияға етеү менән, айғырҙарҙың күрһәткестәре ҡапыл төштө.

Сталин исемендәге колхоз 1947 йылдан бирле башҡорт тоҡомло аттарҙы үрсетеү буйынса государство тоҡомло мал рассадниге зонаһына инә. Тоҡом эшенең дөрөҫ ҡуйылыуы арҡаһында инде күп йылдар буйына колхоздағы йылҡылар ҡышҡы тибен шарттарында ла һис ябыҡмайҙар. Колхоз йылҡыларҙы тибендә аҫырау менән бергә, ҡышҡы буранлы көндәрҙә файҙаланыу өсөн йыл һайын аҙыҡ запасы әҙерләй.

Ҡышҡы тибен осоронда санаға ултыртылған будка күсерелеп йөртелә. Ул тимер мейес һәм башҡа нәмәләр менән йыһазландырылған. Йылҡы ҡараусылар шул будкаларҙа йәшәйҙәр.

Йылҡы фермаһындағы бөтә эш уның мөдире Сидоров һәм көтөүсеһе Желнин иптәштәр тарафынан башҡарыла. Әлбиттә, айырым ваҡыттарҙа, мәҫәлән, торөктороу осоронда, башҡа ярҙамсы кешеләр ҙә фермала эшләйҙәр. Улар ярҙамында торөктороу, ҡолон алыу эштәре ферма работниктәре тарафынан уңышлы үткәреләләр.

Сталин исемендәге колхоз йылҡысылыҡты уңышлы үҫтереү өсөн инде бер нисә йылдар буйына БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулында тотоп килә. Был өлгәшеүҙәрҙе юғары баһалап, Башҡортостан хөкүмәте колхоз председателе Т. Ф. Трифоновҡа 2 мең һум күләмендә государство премияһы һәм диплом бирҙе. Шулай уҡ ферма мөдире С. Сидоров та 1000 һум күләмендә премия һәм диплом алды.

Республикабыҙҙа бындай алдынғылар күп. Улар үҙ-ара социалистиҡ ярышты йәйелдереп, 1950 йылда асыласаҡ Бөтә Союз ауыл хужалығы күргәҙмәһендә ҡатнашыу өсөн көрәшәләр.

И. Сайгин,
Ауыл хужалығы фәндәре кандидаты, Башҡортостан малсылыҡ тәжрибә станцияһының ғилми работнигы.

Башҡорт дивизияһының боевой эҙенән

1943 йылдың февраль баштарында иптәш Сталин башҡорт кавалерия дивизияһына дошман тылына рейдкә инергә приказ бирҙе. Рейдкә инеүселәр алдына Ворошиловград һәм Дебальцево тимер юлын ҡырҡыу, дошмандың тылын тарҡатыу бурыстары ҡуйылды. Дивизия рейдкә инер өсөн танк частәре ярҙамында Ворошиловград өлкәһе Водоток ауылы эргәһендә, үҙенә «ҡапҡа» асты һәм тәүге көндә уҡ дошман тылына 40 километр тәрәнлеккә үтте. Бер нисә көндән ул Дебальцево станцияһы эргәһендәге Чернухина ауылында ныҡынды. Бында дивизия оҙаҡ көндәр буйына Ворошиловград — Дебальцево юлын үҙ ҡулында тотто. Дошманға көстәрен Ворошиловградҡа ебәрергә лә, унан сығарырға ла мөмкинлек бирмәне.

Рейд мәлендә дивизияның боецтары бии тимер юлын ҡырҡтылар, 3 мең немец һалдатын һәм офицерен юҡ иттеләр, бик күп складтарҙы баҫып алдылар, бер нисә тимер юл эшелонын яндырҙылар. Дошман үҙенең ике пехота дивизияһын, бер танковый корпусын алғы фронтҡа ебәрмәйенсә, башҡорт кавалерияһына ҡаршы ебәрергә мәжбүр булды. Шулай итеп, Ворошиловград янындағы беҙҙең частәребеҙ өсөн һөжүм итергә уңайлы шарттар тыуҙырылды.

Дивизияға үҙенең боевой эштәре өсөн гвардия исеме бирелде. Уның командиры генерал Шаймоұратов Ленин ордене менән наградланды.

Дивизия бурыстарын үтәгәс, дошман тылынан сығырға приказ алды. Тылдан ҙур һуғыштар менән сыҡҡан саҡта Юлино II ауылы эргәһендә, генерал Шаймоұратов һәләк булды.

Өфө ҡалаһының 9-сы номерлы башҡорт урта мәктәбе уҡыусыларынан 10 кеше тиҙҙән башҡорт дивизияһының ошо рейде буйынса походҡа китәләр. Улар Ворошиловград өлкәһенең Водоток ауылына барып, унан йәйәүләп, Петровка — Успенка — Ново-Павловка ауылдары һәм Ворошилов, Демченко исемендәге совхоздар аша Чернухинаға барасаҡтар. Унда, урындағы партизандар менән осрашып, дивизия тураһында материалдар туплаясаҡтар. Һуңынан улар Стрюков, 152-се шахта аша Орехово ауылына сығалар. Был ваҡытта улар Юлино II ауылында туҡталып, генералдың ҡәберен табыу сараларын күрергә тейештәр. Унан ары улар Белая Калитваға барасаҡтар. Бында дивизияның 30 геройының ҡәбере бар. Был геройҙар, өс көн буйына һуғышып, үҙҙәре һәләк булдылар, ләкин мөһим урынды дошманға бирмәнеләр. Йәш туристәр ошо геройҙарҙың ҡәберен тәртипкә килтереп, сәскә шәлкемдәре һаласаҡтар. Унан Морозовскийҙа, башҡорт халҡының һөйөклө улы Байғужа Сәетғәлин ҡәбере янында буласаҡтар.

Йәш туристәр алдында поход ваҡытында башҡорт дивизияһы тураһында иҫтәлектәр, хәрби фольклорҙар йыйыу бурысы тора.

Походтың маршруты 5 мең километр, шуның 300 километры йәйәү үтеләсәк. Походтың срогы 35 көн.

Ә. Ихсан.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Франция коммунистәр партияһының мөрәжәғәте

ПАРИЖ, 9 июнь. (ТАСС). «Юманите» газетаһы Франция коммунистәр партияһының Франция хөкүмәтенә Германияға ҡарата политикаһына арналған мөрәжәғәтен баҫып сығарҙы.

Мөрәжәғәттә былай тип әйтелә:

«Бөтәһенән элек Германиямы? — Юҡ!

«Лондон конференцияһында Франция хөкүмәте, ысын мәғәнәһе менән милли булған интерестәрҙе яҡлауҙан баш тартып, Көнбайыш Германияның берәнсе һауҙетта аяҡҡа баҫтырыу менән риза булды. Ул Германия тарафынан бергә тулышыу тейешле булған репарацияларҙан баш тартты. Үҙенең Германия менән союз төҙөү тураһындағы ынтылыштары Францияны аяҡҡа баҫтырыуҙан юғары ҡуйҙы. Ул Германияның хәрби көҡәтен ҡайтанан ҡоторғоу ярҙам итә һәм илдең иминлеген ҡурҡыныс аҫтына ҡуя.

Хөкүмәт һәм де Голль бер үк политиканы — Германия яклы политиканы үткәрәләр

Хөкүмәт фактик әлегә генерал де Голлә даими рәүештә яҡлап килгән политиканы үткәрә. 1945 йылдың сентябрендә де Голль хөкүмәт етәксеһе сифатында Германияға барған ваҡытында былай тигәйне: «Беҙ бында һеҙҙең менән бергә эш итеү өсөн килдек». Бөтә Франция һәм Германия тураһында һөйләп, ул былай тине: «Германия көнбайышы бөрөкмәгә инеү өсөн мөмкинлек алырға, ул билдәле бер роль уйнарға һәм ышаныс булдырырға тейеш».

1914—1918 йылдарҙағы һуғыштан һуң ошондай үк хәл булды

1914—1918 йылдарҙағы һуғыштан һуң Франция етәкселәре халыҡҡа һәм коммунистәр ҡарата нәфрәтләнеү аркаһында Гитлер Германияһының ҡоторолеуен еңеләйттеләр. Шуның арҡаһында Франция Германияға күп ҡан түгерга һәм матерриаль юғалтыуҙар кисерергә тура килде.

Бөгөн дә шул уҡ сәйәсәт буйынса, шул уҡ кыйынлыҡ перспективалар менән ошондай үк политика алып барыла.

Тантаналы протест

Францияның коммунистәр партияһы, Франция халҡының фекерен белдереүгә ышанған хәлдә, Лондон конференцияһында Франция хөкүмәтенең тотҡан позицияһына ҡаршы тантаналы протест белдерә.

Францияның интерестәренә бер йән-бер ҡайғыртыу булған политика, милләтте һаҡлау политикаһы әйтелгән. Был программа коммунистәр партияһы Үҙәк Комитеты (Женевильеда 1948 йыл 14—15 апрелдә үткән пленумда) тарафынан ҡабул ителгән һәм француз халҡының хуплауына таянылған. Был программа сығыу политика алдында Франция тарафынан үткәрелергә тейеш булған политиканы тубәндәгесә билдәләй: «Империалистик лагерҙең һуғыш әҙерләү политикаһына Францияның бәйләүсе килешеүҙәрҙе һәм договорҙарҙы юкка сығарыу. Был килешеүҙәр һәм договорҙар («Маршалл планы», Брюссель хәрби союз) сит илгә бирер мөмкин бөлгән илдәр ҡыйратҡан мили бойондороҡһоҙлоҡҡа ҡаршы килеүсе шарттарға буйһондоралар, Францияны элек уның дошманы булған илдәр менән бәйләйҙәр, уны союзниктарға ҡаршы аяҡҡа баҫтыралар.

Союзниктар араһындағы килешеүҙәргә һәм Берлиндәге илдәр өсөн ойошмалы уставы ерекә етмәгән дәүләттең демократик, үҙаллы һәм иминлек тыныслыҡ урынлаштырыуға юнәлтелгән Советтар Союзының һәм бөтә донъяларҙың тыныслыҡ һөйөүсе бөтә көстәрен тырышлыҡтарында Франция актив ҡатнашырға тейеш».

Францияның намыҫлы илдары интерестәре хурлыҡлы рәүештә баш тартҡан хөкүмәтҡа — Францияны хәүефһеҙлеге һәм Германиянан репарациялар алыу хоҡуҡтарына ла.

Кем бындай политиканы тормошҡа ашыра ала?

Франция политикаһын тормошҡа ашырыу өсөн эшселәр синыфы һәм коммунистәр партияһы билдәле роль уйнай алырлыҡ демократик берҙәм хөкүмәт төҙөү талап итәлә. Францияның һәм француз ҡатын-ҡыҙҙары, власҡа шундай хөкүмәт ҡуйыуҙы әҙерләү өсөн берләшергә, һәм Лондон конференцияһының ҡарарҙарын парламент тарафынан кире ҡағылыуын талап итергә. Беҙ Францияның бойондороҡһоҙлоғо, хоҡуҡы һәм иминлеге һаҡлау өсөн Германияны аяҡҡа баҫтырыуға юл ҡуймаҫҡабыҙ. Шул тиклем француздар бик булыу өсөн һәләк булмаҫ.

Француздар һәм француз ҡатын-ҡыҙҙары үҙебеҙҙең ҡараштарыбыҙға, ниндәй дингә ышаныуыбыҙға ҡарамаҫтан берләшәйек; берләшкән телек һәм батырлыҡ менән — берҙәм рәүештә, тыныслыҡтың бөйөк эштәренә һәм милли бойондороҡһоҙлоктоң тантанаһына өлгәшеү өсөн көрәшәйек.

Йәшәһен Франция! Йәшәһен республика!»

Алты держава конференцияһының карарҙары тураһында АДН агентствоһы

БЕРЛИН, 10 июнь. (ТАСС). Берлин газеталары «Нейэс Дейчланд» һәм «Берлинер Цейтунг» АДН агентствоһының белдереүен баҫып сығарҙылар. Был белдереүҙә Берлиндең көнбайыш секторҙарындағы һәм Көнбайыш Германиялағы матбуғат Германия мәсьәләләре буйынса Лондон конференцияһының йомғаҡтары тураһында коммюникеға ҡушымта итеп бирелгән «1-се номерле өҫтәлмәнең» әһәмиәтен кәметергә тырыша. Шуның менән бергә, тип яҙа газета, «Рур өҫтөнән халыҡ-ара контроль» тип аталған был «1-се номерле өҫтәлмә» Германиянан Рурҙы ғәмәлдә айырып алыу һәм билдәһеҙ кеше тарафынан эш башҡарыу йөкмәтелгән «халыҡ-ара власть» флагы аҫтында Германияның тормошо өсөн иң әһәмиәтле булған территорияһын тотошо менән үҙ ҡулдарына алыу тураһындағы ҡарарҙы бик асыҡ кәүҙәләндерә.

«Рур тураһындағы килешеү, — тип дауам итә агентство, — Германия өлкәһендәге Рур промышленносен Европа континентенда Америка империализменең позицияһын нығытыу өсөн билдәләнгән «Маршалл планындағы» йыртыҡтарҙы ямау өсөн файҙаланыуҙы үҙенең төп маҡсаты итеп ҡуя.

Ләкин шуның менән бергә тағы ла алыҫыраҡ маҡсат, яңы империалистик агрессия өсөн Европала хәрби плацдарм әҙерләү маҡсаты ла күҙҙә тотола. Конференция тарафынан шундай ҡарарҙар ҡабул ителгән — немец демократик общественносе оккупациялауҙың өс йылы буйына был ҡарарға ҡыҫҡан рәүештә ҡаршы сыға килде.

Рур өсөн «Халыҡ-ара власть» төҙөү тураһындағы ҡарар Германиянан Рур өлкәһен һәм уның ҡеүәтле промышленный потенциалын ғәмәлдә тартып алыу тигән һүҙ.

«Халыҡ-ара власть» тигән исем, «халыҡ-ара иминселек», һәм «дөйөм экономик аяҡҡа баҫтырыу тураһындағы» фразалар ҡеүек үк, Рур промышленносен Англия-Америка властаре, бөтәһенән элек, АҠШ ҡарамағына тапшырыуҙы ғына йәшерә.

«Рурҙа милк мөнәсәбәттәре һәм Рур монополияларын бөтөрөү тураһындағы мөһим мәсьәлә, — тип әйтелә агентствоның белдереүендә унан ары, — тулыһынса ситләтеп үтелгән. Лондон конференцияһы Рурҙа тәртип урынлаштырыу тураһында ошондай санкция бирҙе — был тәртип буйынса Америка һәм Британияның монополистик капиталары, Германияға «ярҙам» тигән ялған флаг аҫтында, күмер һәм ҡорос промышленностарының нацистик барондарына таянған рәүештә хәрәкәт итеп, Рурҙа контролһеҙ хужалыҡ итергә тейештәр.

«Халыҡ-ара власҡа» Рур күмерен һәм коксын үҙе теләгәнсә бүлеү хоҡуҡы бирелә. Быҙың маҡсаты сит илгә тауар сығарыу һәҙемтаһендә Германия иҫәбенә байыу һәм немец күмерен һәм коксын башҡа Европа илдәренә баҫым яһау өсөн файҙаланыуҙан тора.

«Рурҙағы сит ил интерестәре», быҡаса йәшәп килгән килешеү күләмендә булмаһын, шулай уҡ ҡасан да булһа бер ваҡыт илгәшелергә тейеш булған килешеүҙәр буйынса булмаһын, айырым һаҡ һәм күҙәтселек аҫтына алыналар. Был Рурҙа сит ил капиталы власеңең нығыуына һәм киңәйеүенә ишекте киң аса.

Рурҙа протекторат режимен нығытыу өсөн Лондон конференцияһының ҡарары Германияға ҡарата «тейешле мәжбүри сараларҙы тормошҡа ашырыу» ҡараклекте алдан уҡ билдәләй. Бындай ҡурҡытыу юлы менән немец халҡының ҡаршылыҡ күрһәтеүен туҡтатырға теләйҙәр. Был ваҡиғала ҡулланыла торған аныҡһыҙ һөйләмдәр «халыҡ-ара власть» тарафынан Рурҙа экономик характерҙа ғына түгел, бәлки политик характерҙа ла сикләнмәгән баш-баштаҡлыҡтың мөмкинлеге тураһында һөйләйҙәр. Шулай итеп, алты державаның ҡарары азат һәм бойондороҡһоҙ Германия өсөн көрәшеүсе демократик көстәрҙең хәрәкәтен тулыһынса баҫтырырға ынтылыуҙы кәүҙәләндерә».

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 10 июнь. (ТАСС). Кисә иркле Греция радиостанцияһы демократик армияның Эпирҙағы операциялары тураһында «Элефтери Эллада» агентствоһының белдереүен тапшырҙы. Белдереүҙә, 7 июнда демократик армия частәре король армияһының 76-сы бригадаһы штабына һәм охрана ротаһына көтөлмәгәндә һөжүм иттеләр, тип әйтелә. Һуңғы моментта бригада генералы Манидакис, бригаданың штаб начальнигы һәм Англия майоры Хагат ҡасҡандар. Бик күп һалдаттар пленға алынған.

Радиостанция Румели халҡының ғазапланыуы тураһында хәбәр итә. Унда монархист-фашистарҙың терроры хөкөм һөрә. Улар үҙҙәренең фронтта уңышһыҙлыҡтары өсөн тыныс халыҡтан үс алалар. Монархист-фашистар үткән бөтә ауылдарҙа йөҙләгән ҡатындарҙың, балаларҙың, ҡарттарҙың мәйеттәре ята, яндырылған йорттар ҡарайып торалар, баҫыуҙар тапталғандар. Эвритания һәм Флорида өлкәләрендә күпселек ауылдағы халыҡтар монархист-фашистарҙың концентрацион лагерҙарына ҡыуылғандар.



Башҡалала теннис буйынса йәйге спорт сезоны асылды.

Һүрәттә: «Динамо» стадионында уйын башланыр алдынғы күренеш.

Г. Буравин фотоһы.

40 мең бала ял итәсәк

Республикала балаларҙың һаулығын һаҡлауға һәм уларҙың күңелле ял итеүҙәренә ҙур әһәмиәт бирелә. Быйыл республикабыҙҙа йәйге каникул ваҡытында пионер лагерҙарында һәм санаторийҙарҙа 40 меңгә яҡын бала ял итәсәк.

Хәҙерге көндә республика буйынса 104 урында пионер лагере асылды. Лагерҙарҙа эшләү өсөн 200-ҙән артыҡ пионер лагере начальниктары һәм өлкән пионер вожатыйҙар һайланып алынды, улар өсөн 5 көнлөк семинар үрелде. Семинарҙа улар [illegible] хәл тураһында, пионер [illegible] рендә тәрбиә эше, культура [illegible] эш, крайҙы өйрәнеү [illegible] миәте, пионер лагерҙарында физкультура эшенең ҡуйылышы, общественный-политик [illegible] башҡалар тураһында [illegible] лекциялар тыңланылар.

Тәбиғи байлыҡтарҙы һаҡлау обществоһының филиалы

Беҙҙең республика үҫемлек һәм хайуандарға бик бай. Бынан башҡа, Башҡортостанда иәмерйәләр, ер аҫты йылғалары, ҙур күлдәр һәм башҡалар күп.

Бына ошо тәбиғәт һөйкәлләрен һаҡлау, уларға ваймыһыҙ ҡараусыларға ҡаршы көрәш, тәбиғи байлыҡтарҙы дөрөҫ файҙаланыуҙы күҙәтеү, үҙ крайыңды өйрәнеү — мөһим бурыс.

Башҡортостанда тәбиғи байлыҡтарҙы һаҡлау буйынса Союз обществоһының филиалы төҙөлдө. Ә ауылдарҙа, мәктәптәрҙә һәм пионер йорттарында [illegible] дың ячейкалары, [illegible] ойошторола.

Уҡыусыларҙың был общество эшләүе ҙур тәрбиә әһәмиәтенә эйә. Был, уларҙа тәбиғәтте [illegible] тойғоһо тәрбиәләйәсәк.

Яңы гостиница

ОКТЯБРЬСК. Бында 40 урынлы яңы гостиница асылды. Ул бөтә кәрәкле инвентарҙар менән йыһазландырылды. Яңы тимер койкалар һәм икешәр комплект постель әйберҙәре, одеялдар һәм башҡалар менән тәьмин ителде.

Гостиница шулай уҡ радио[illegible]тырылды.

Мәктәп яңы уҡыу йылына әҙер

Тәтешле районы. Шулған 7 йыллыҡ мәктәбендә (директоры иптәш Вильданов) 1948—1949 уҡыу йылына әҙерлек тамамланды. Мәктәпкә капитал ремонт үткәрелде, парталар, өҫтәлдәр, ултырғыстар, класс таҡталары төҙәтелеп, буяп ҡуйылды.

Мәктәп территорияһы ҡойма менән уратып алынды, физкультура майҙаны төҙөлдө.

Агитаторҙар участкаларҙа

Өлкә партия мәктәбе [illegible] лары Өфө ҡалаһы хеҙмәт[illegible] араһында, элекке һайлау [illegible] ларында, массовый агитация [illegible] тәрен өҙләкһеҙ алып [illegible] Б. Ямалов, Ғ. Насиров [illegible] дынғы агитаторҙар ҡыҫҡа ваҡыт эсендә 5—6-шар [illegible] уҙғарҙылар. Улар [illegible] һәр төрлө темаға, күңелле [illegible] үткәрәләр. Шуның өсөн [illegible] ләр, хеҙмәткәрҙәр һәм йорт [illegible] калары агитаторҙарҙың [illegible] рын ҙур ҡыҙыҡһыныу менән [illegible] лайҙар.

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ.

Тәнҡит һәм библиография

Шағирҙың тәүге аҙымы

«Йәшен уттары» — йәш шағир Лоҡман Хәким-Ғиләжев үҙенең тәүге китабын шулай атаған. Был исем китапҡа ингән шиғырҙар өсөн дә, авторҙың үҙен дә бер иш тиклем характерләй торған исем. Ысындан да шиғырҙарҙың күбеһендә, йәшен уттары кеүек, яҡты тойғолар һәм авторҙың ысын талант сатҡылары сағылып киттеләр.

Әҙәбиәткә аҙым яһаусы һәр йәш кеше, әгәр ул талантлы икән, ниндәй ҙә булһа яңылыҡ, үҙенсәлек алып килә, — тормошто гүзәлләндерә, кешенең тойғоларын байыта. Дөрөҫ, ул үҙенсәлектәр — яңылыҡтар башта күп тә булмаҫҡа мөмкин. Яҙыусы үҫә барған һайын, уның үҙенсәлеге тулылана, бер бөтәнгә әйләнә.

Лоҡман Хәким-Ғиләжев тә, әҙәбиәткә Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ныҡлап аҙым яһаусы йәш шағирҙарҙан береү. Тәүге китабына уның, башлыса, шул йылдарҙа яҙылған әҫәрҙәре тупланғандар. Һәм, ҡыйыу әйтеп булыр, [illegible]

[illegible]

теләй. Был шиғырҙарға һин ышанаһың, үҙең дә шундай уҡ кисерештәр менән йәшәй башлайһың, ҡыуанаһың.

Бына «Таныш ерҙәр, таныш йөҙҙәр» шиғыры:

«...Ҡарап торғаным бар
түңгәләкләнеп
Быуын һикертеүен арыштың.
Ишелеп аҡҡан йәшел тулҡын
менән
Беренсе ҡат шунда таныштым.
Тағы ҡайттым мин һәм
тулҡынланған
Башаҡтарҙа күрҙем йөҙөмдө, —
Ер ҡуйынына төшкән бөртөк
һымаҡ,
Бураҙналар һаҡлай эҙемде.
Минең яҡташтарҙың
күкрәгендә,
Көн булһа ла, яна йондоҙҙар!»

Лоҡман Хәким-Ғиләжев тойғолар шағиры. Ул ысынбарлыҡ күренештәрен тик теркәп сығыусы ғына түгел, йөрәге аша үткәреп, уны нескә үҙенсәлектәрендә дөйөмләштереүгә тырыша. Тик шағирҙа бер нәмә етмәй әле: ул тор[illegible]

[illegible]

бик әйбәт сағылдырһалар ҙа, яңы булһалар ҙа — поэтик оҫталыҡта эшләнеп еткерелмәгән. Улар — балсыҡтан таҙартып бөтмәгән, шымартылмаған самородоктар кеүек. Был шымартылып етелмәгәнлек башҡа шиғырҙарҙа ла осрай.

[illegible]

«Сайҡалдылар ырҙанылған ҡосаҡ ҡулдар.»

«Күрәм кеүек, ҡуйыр яҡты ҡояш нурын» [illegible]

[illegible]

талабы тағы ла үҫә, ҙурая. Күреһең, китапты редакторлаусы шағир Әкрәм Вәли иптәш был ҡағиҙәне иҫтә тотоп етмәгән. Юҡһа, шундай «ваҡ» етешһеҙлектәргә һәм эшләнеүе етмәгән «Ул оҙатып ҡалды» шиғыры баҫылыуға [illegible]

[illegible]

Ебәрмәй тора һымаҡ!»

Автор ҙа, редактор ҙа, ни өсөндер, ябай ғына нәмәләрҙе күрмәй ҡалдырғандар. Ул амбразура — Александр Матросовтың үлемһеҙлек һәйкәле булып әле лә тора. Бында икенсе юлды: «Күптән ут сәсмәй инде» тип еңел төҙәтеп булыр ине. «Ләкин ул терелер кеүек» түгел, — тере шикелле. Шулай уҡ мәйет һүҙе уңышһыҙ, ниссектер, ауыр еҫ аңҡыта, — кәүҙәһен, тәнен йәки башҡаса кәрәк.

Тағы шуны әйтергә кәрәк, Башгосиздат тарафынан «Йәшен уттары» бик иғтибарһыҙ сығарылған: корректура хаталары тауыҡ та сүпләп бөтмәҫлек... Китаптың тәүге битенә ҡарап, ҡайһы йылда сығарылғанын да белеп булмай, унда бары — «194» цифраһы тора. Тәүге биттә башланған хата — аҙаҡтағы биттәрҙәге бер шиғырҙың яҙылыу датаһын күрһәткән — «947» һанына тиклем бара. Китаптың 43-сө бите йолҡоп алынып, ҡабат баҫып, йәбештерелгән. Шулай ҙа, китапты сығарыу өсөн яуаплы кешеләр: «ябай пушкарь» урынына һаман — «бай пушкарь» тип ҡалдырыу хәйләһен тапҡандар...

Производствола продукцияның сак ҡына етешһеҙлеге булһа, уны — брак, тиҙәр. Бракка ҡаршы беҙҙә ҡаты көрәш бара. Был китапты сығарғанда Башгосиздат өсөн, күрәһең, ул закон яҙылмағандыр... Беҙҙеңсә, талантлы йәш яҙыусының беренсе әҫәрен сығарыуға бындай өҫтән ҡарау, китап уҡыусыларҙың сифат талаптары менән иҫәпләшмәү — юл ҡуйылмаҫлыҡ хәл.

Баязит Бикбай.

ҠЕШЕЛӘРҘЕ СТРАХОВАТЬ ИТЕҮ

(Врач таҡытмаһы буйынса страхование)

16—60 йәштәге бөтә гражданлар страховать ителә алалар. Страхование срогы [illegible] дан алып, 20 йылға тиклем, ләкин страховать ителеүсенең йәше 65-тән дә юғары срокка страховать ителмәй.

Теләгән суммаға страховать ителергә мөмкин. Страховой взносын түләү, кешенең йәшенә һәм страховать ителеү срогына ҡарап билдәләнә.

Страхование суммаһы, [illegible] рәр төрлө бәхетһеҙлектә ҡарап, ғүмерлеккә эшкә һәләтлеген юғалтҡан ваҡытта страховать ителеүсенең үҙенә түләнә, ә ул үлгән ваҡытта документта күрһәтелгән кешегә, йәки кешеләргә түләнә.

Страховать ителеү өсөн белешмәләр алыу өсөн Госстрах инспекцияһына, йәки страховой агентҡа мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Башгосстрах.

Редакция адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00173 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 1490[illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 118 15 июнь шишәмбе

Хаҡы 20 тин

Бөгөнгө номерҙә:

Румыния Халыҡ Республикаһының Министрҙәр Советы председателе доктор Петру Грозанан Иосиф Виссарионович Сталинға телеграмма. (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында. (1-се бит).
Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлөшөндә. (1-се бит).
ПАРТИЯ ТОРМОШО. И. Болдогоев.—ВКП(б)-ның Октябрьск ҡала комитетының ыңғай тәжрибәһе. (2-се бит).
Башҡорт АССР-ының бөтә колхозсыларына һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарына, МТС һәм совхоз работниктарына һәм ауыл хужалығы специалистарына Совет Армияһында хеҙмәт итеүсе бер төркөм воиндарҙың мөрәжәғәте. (2-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
СОВЕТ ТӨҘӨЛӨШӨ. Ә. Вәлиев. — Яңыса эшләүҙең ҡайһы бер йомғаҡтары. (2-се бит).
Комбайндар ремонты темпын һәм сифатын ҡырҡа күтәрергә! (3-сө бит).
Зәйнәп Бинишева.—Завод ҡыҙы. (3-сө бит).
ФЕЛЬЕТОН. Р. Луговой. — Егупов һәм уның компанияһы. (4-се бит).

Юл төҙөү буйынса удар айлыҡ

Юлдар — халыҡ хужалығында ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә. Улар ни тиклем төҙөк булһалар, илебеҙҙә хәрәкәт һәм йөк ташыу эштәре лә шул тиклем уңышлы һәм тиҙ башҡарыла ала. Шул уҡ ваҡытта төҙөк юлдар һәм күперҙәр автомашиналарҙың, тягачтарҙың, йөк арбаларының һәм башҡа хәрәкәт средстволарының экономиялы тотолоуын һәм оҙаҡҡа сыҙауын тәьмин итә.

Коммунистар партияһы һәм Совет Хөкүмәте юл төҙөлөшө тураһында ғәйәт ҙур хәстәрлек күрәләр һәм был мөһим хужалыҡ тармағына йыл һайын күп миллионларса һум средстволар бүленә. Шул уҡ ваҡытта илебеҙҙең эшсәндәре юл төҙөү эшендә үҙҙәренең хеҙмәттәре менән дә актив ҡатнашып киләләр. Был тәбиғи ҙа. Советтар илендә үткәрелгән бөтә саралар халыҡ, масса эше булып тора. Шул иҫәптән юл төҙөлөшө эшенә бөтә ауыл һәм ҡала эшсәндәре үҙҙәренең хеҙмәттәрен аямай һалалар.

Сталинсы яңы биш йыллыҡтың хәл иткес һәм тамамлаусы йылдары—1948—1950 йылдарҙа республикабыҙҙа ҡала һәм ауыл эшсәндәренең ҡатнашлығы менән 335 километр оҙонлоғонда яңы юл, 5.900 метр оҙонлоғонда яңы күперҙәр һалынырға, 907 километр юлға, 15.690 метр күперҙәргә һәм юл торбаларына капиталь ремонт үткәрелергә тейеш. Быйыл ҙур ғына өлөшө ағымдағы йылда — сталинсы биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылында үткәрелә.

Йәй — юлдар һәм күперҙәрҙе ремонтлау, аяҡҡа баҫтырыу һәм яңыларҙы төҙөү өсөн иң уңайлы осор. Шул уҡ ваҡытта йәй аҙағында 1948 йылдың мул урожайын йыйып алыу бурысы ла тора. Юлдарҙы, күперҙәрҙе был мөһим кампанияны хеҙмәтләндереүгә алдан уҡ әҙерләргә кәрәк. Бына ошоларҙы иҫкә алып, юл төҙөү эштәрен ҡыҫҡа срокта, урожай йыйнау башланғансы тамамлау маҡсатында Башҡортостан хөкүмәте һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы юл төҙөү буйынса удар айлыҡ иғлан иттеләр һәм газетабыҙҙың бөгөнгө номерында был мөһим ҡарар баҫылып сығарыла.

Удар айлыҡ 15 июндән 15 июлгә тиклем дауам итәсәк. Был ҡыҫҡа срокты рациональ рәүештә файҙаланып, юлдарҙы, күперҙәрҙе төҙөкләндереү буйынса күп эштәр башҡарыу талап ителә. Сер түгел, республикабыҙҙа юлдарҙың, күперҙәрҙең торошо һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел әле. Бөтә урындарҙа трактовый юлдар, күп күперҙәр, промышленность, ауыл хужалығы предприятиеләренә инеү юлдары, серьез ремонт талап итәләр, күп кенә урында яңы юлдар һәм күперҙәр һалаһы бар.

Былар бөтәһе лә БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге юл управлениеһенең, район юл бүлектәренең, ҡала, район Советы исполкомдарының һәм ВКП(б)-ның ҡала, район комитеттарының удар айлыҡта эште айырыуса яҡшы ойоштороуҙарын, мөмкинлектәрҙе тулыһынса һәм рациональ рәүештә файҙаланыуҙарын талап итә.

Беренсе нәүбәттә һәр бер колхозға, ауыл Советына юл участкалары беркетергә һәм уларҙа эшләү өсөн аныҡ графиктар булдырырға кәрәк. Шул уҡ ваҡытта график буйынса билдәләнгән эшсе һәм тартыу көстәре тулыһынса эш урындарына сығарылырға, был өлкәлә һүлпәнлеккә юл ҡуйылмаҫҡа тейеш.

Район Советы исполкомдары үҙ райондарындағы, ауыл Советтары һәм колхоздар үҙ территорияларындағы юлдарҙы төҙөкләндереү һәм уларҙы яҡшы хәлдә тотоу өсөн тулыһынса яуаплылар. Был мөһим принципте бөтә урында аныҡ рәүештә ғәмәлгә ашырырға кәрәк. Ә промышленность, ауыл хужалығы һәм башҡа предприятиеләрҙә юлдарҙың торошо өсөн яуаплылыҡ был ойошмаларҙың етәкселәренә йөкмәтелгән. Улар шулай уҡ үҙ бурыстарын үтәүгә яуаплы ҡарарға, юлдарҙы һәм күперҙәрҙе төҙөкләндереү эшендә актив ҡатнашырға бурыслылар. Предприятиеләрҙәге бөтә көс — эшсе көстәре, автомашиналар, тягачтар, экскаваторҙар ошо маҡсатҡа хеҙмәт итеүгә йүнәлдерелергә тейеш.

Юл төҙөү айлығында юлда эшләүселәр араһында политик-массовый эштәрҙе киң йәйелдереү — хеҙмәт етештереүсәнлегенең юғары кимәлдә булыуын тәьмин итәсәк. Һәр бер төҙөү участкаһында газета, журналдар булдырырға, эшселәрҙең культуралы ялын ойошторорға кәрәк. Бөтә урында бригадалар менән бригадалар, колхоздар менән колхоздар араһында удар айлыҡ заданиеләрен ҡыҫҡа срокта һәм яҡшы сифатлы итеп башҡарыу өсөн социалистик ярышты киң йәйелдерергә кәрәк.

Был мөһим кампаниелә сауҙа ойошмалары, медицина-санитария работниктәре ситтә тороп ҡала алмайҙар. Улар юл төҙөү участкаларында көн-күреш тауарҙары менән сауҙа итеүҙе йәйелдерергә һәм бөтә урында медицина ярҙамын киң ойошторорға тейештәр.

Юлдарҙы, күперҙәрҙе ремонтлау һәм яңыларын төҙөү — государство әһәмиәтендәге мөһим бурыс. Урындағы партия, совет ойошмаларының, район юл бүлектәренең етәкселәре удар айлыҡты уңышлы үткәреүгә бөтә көстө туплаға, эшкә конкрет һәм оператив етәкселек итергә бурыслылар. Юл төҙөлөшө буйынса билдәләнгән заданиеләрҙе бөтә урында тулыһынса үтәлеүенә өлгәшергә, урожай йыйнау кампанияһын был өлкәлә тулы әҙерлек менән ҡаршыларға кәрәк.

Бөтә көстө удар айлыҡты уңышлы үткәреүгә туплайыҡ!

Республикабыҙҙы яҡшы һәм төҙөк юлдары, күперҙәре булған алдынғы республикаға әйләндерәйек!

Совет Социалистик Республикалар Союзы Министрҙәр Советы Председателе Иосиф Виссарионович СТАЛИН әфәндегә

Румынияның репарацион түләүҙәрен 50 процентҡа кәметеп киң күңеллелек күрһәткән өсөн Румыния Халыҡ Республикаһы Хөкүмәте исеменән һәм үҙ исемемдән Һеҙгә ҡайнар рәхмәт белдерәм.

Румын халҡы Һеҙҙең ҡарарығыҙҙы энтузиазм менән ҡотлай. Фашистар иҙеүенән беҙҙең илебеҙ героик Совет Армияһы тарафынан ҡотҡарылғандан һуң алып күрһәтелгән ярҙам һәм булышлыҡ өсөн румын халҡы үҙенең бөйөк һәм ҡеүәтле күршеһе һәм дуҫы Советтар Союзына һәм лично Һеҙгә мәңге рәхмәт әйтер.

Һеҙҙең тарафтан беҙҙең халҡыбыҙға күрһәтелгән бөйөк ярҙам Румынияны реконструкциялау һәм экономик яҡтан артабан үҫтереү эшенә, ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренең материаль хәлен яҡшыртыу эшенә ҙур булышлыҡ күрһәтәсәк.

Совет Социалистик Республикалар Союзы Министрҙәр Советы Председателе әфәнде, беҙҙең тәрән ихтирамыбыҙҙы ҡабул итегеҙ.

Румыния Халыҡ Республикаһының Министрҙәр Советы Председателе доктор Петру Гроза.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттарының иғтибарына

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһы 15 июнда, көндөҙгө 12 сәғәттә Верховный Советтың ултырыштар залында асыла (Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы йорто).

Депутаттарҙы регистрациялау Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы йортонда, иртәнге 9 сәғәттән төнгө 12 сәғәткә тиклем үткәрелә (2-се ҡат, 91-се номерлы бүлмә, телефон номеры 2—88—82).

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛЫ ТӨҘӨЛӨШӨНДӘ

Стәрлетамаҡ районының «Яңы ауыл» колхозы члендәре яңы тимер юл төҙөлөшөндә эшкә беренсе булып башланылар. Беркетелгән участкала ҡырҡ кеше урынына ике йөҙ ҙә алтмыш колхозсы, ун өс ат эшләй. Яңауыллылар тәүге көндәрҙә үк хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр. Улар 9 июнда көндәлек заданиены 632, 10 июнда 850 процентҡа үтәнеләр.

Һүрәттә: «Яңы ауыл» колхозы колхозсылары юл төҙөү эшендә.

В. Жданов фотоһы.

Массовый воскресниктәр

МӘЛӘҮЕЗ, 14 июнь. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). 13 июнда, йәкшәмбе көндө районда Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөү буйынса массовый воскресник ойошторолдо. Унда бөтәһе өс мең ярымдан артыҡ кеше ҡатнашты. Тик район үҙәгендәге ойошмаларҙан ғына воскресникта 1.178 кеше, 44 ат, биш автомашина эшләне. Трасса буйындағы «Пробуждение», «Рассвет I», «Смычка», «Красный Восток», Молотов исемендәге колхоздарҙан ҡатнашыусылар эш урындарына шәмбе көндө үк кис килеп ҡундылар.

Мелькомбинат директоры иптәш Агафонов 29 эшсе, хеҙмәткәрҙән торған үҙ коллективен трассаға автомашинала килтерҙе. Коллектив ер ҡаҙыу, автомашинала балсыҡ ташыу эштәрен башҡарҙы. Иптәш Агафонов үҙе өс кубометр ер ҡаҙып, күптәргә өлгө күрһәтте.

VII-се съезд исемендәге артелдән воскресникка 56 кеше, 5 ат сыҡты. Артель председателе иптәш Фабриканов үҙе бер иптәше менән носилкала көндәлек нормаһын 200 процентҡа үтәне. Улар ике кеше носилкаға балсыҡ тейәп, үҙҙәре ташынылар. Район связь контораһы (начальнигы иптәш Серегин) коллективе 63 кубометр ер эштәрен башҡарҙы.

Больница һәм ит комбинаты работниктәренең, уҡытыусыларҙың да күрһәткестәре юғары.

Трассала эшләүселәргә киске ял ваҡытында район культура йортоноң художестволы үҙ эшмәкәр түңәрәге көсө менән ҙур концерт бирелде. ВКП(б) район комитетының кадрҙар буйынса секретары Баранова, парткабинет мөдире Хохлова, райсовет исполкомы председателе урынбаҫары Ивлев иптәштәр ағымдағы момент темаһына доклад яһанылар. Партия райкомы тарафынан ебәрелгән агитаторҙар Хапин, Остарников иптәштәр колхозсылар араһында халыҡ төҙөлөшө тураһында әңгәмәләр үткәрҙеләр.

Ғ. Ҡотлобаев.

* * *

СТӘРЛЕТАМАҠ. (Телефон аша). Юл төҙөүселәргә яҡындан ярҙам итеү маҡсатында район ойошмаларының инициативаһында ял көндө воскресник үткәрелде. Воскресникта меңдән артыҡ кеше ҡатнашты һәм байтаҡ күләмдә ер ҡаҙылды, балсыҡ ташылды.

Бөгөнгө көндә трассала райондың өс меңдән артыҡ колхозсыһы һәм 300 самаһы аты эшләй. 14 июнда Карл Маркс исемендәге колхоздың колхозсылары (Аллағуат ауыл Советынан) үҙҙәренең күләм заданиеләрен тамамланылар ҙа инде. Улар бер мең ярым кубометр самаһы ер эштәре башҡарҙылар.

Башҡа ҡайһы бер колхоздар ҙа күләм заданиеләрен үтәү алдында торалар.

Яңы тимер юл трассаһында

Аллағуат ауыл Советына ҡараған колхоздар трассаға иң элек сыҡтылар. Бында, билдәләнгән кешеләр генә түгел, ауылдағы биш колхоздың бөтә халҡы ла килде.

— Юл беҙҙең ауылдан башлана икән — эште лә беҙ башлап ебәрергә тейешбеҙ, — тинеләр улар.

Тәүге көндән үк участкаларҙа социалистик ярыш ойошторолдо. «Яңы ауыл» колхозынан ер эштәрен башҡарыу өсөн колхоздың бөтә члендәре эшкә сыҡтылар. 40 кеше һәм өс ат эшләргә тейеш ине. Ә юлда көн һайын ике йөҙләп кеше һәм 13 ат эшләй. Бында үҙенә махсус унар кешелек звенолар һәм уларҙы берләштереүсе бригадалар төҙөлгән. Һәр звеноға билдәле эш күләме бирелгән. Һәр кем үҙ нормаһын үтәү өсөн көрәшә. Әблиева Әбибә, Мөрсәлимова Мәрйәм иптәштәрҙең звенолары хәҙер ҙур уңыш менән эшләйҙәр.

«Маяҡ» колхозы айырым бер үҙенсәлек менән эшләй. Бында күпселек эш скреперҙәр ярҙамы менән башҡарыла. Бригадир Логинов икешәр ат еккән дүрт скреперҙе бик дөрөҫ итеп эшләтеүгә өлгәшкән. Ер алдан һөрөлгән. Аттар ярты грабарь ҙурлығындағы ҙур һоҫҡоно тартып, йомшаҡ ергә инәләр. Ат тотоусы һис туҡтап тормаҫтан, һоҫҡоноң ике тотҡаһын үҙенә тарта ла, ул үҙлегенән үҙе ергә ҡаҙалып эсенә балсыҡты йыя. Тейәп тороу кәрәкмәй. Насыпҡа барып етеү менән тотҡаны күтәреп ебәреү генә талап ителә. Шул рәүешле аттар түңәрәк буйынса әйләнеп йөрөй. Бер скрепер артынан икенсеһе, өсөнсөһө ебәрелә.

Ул ябай механизм. Ләкин бик уңайлы. Бер сәғәттә 30—40 тапҡыр әйләнеш яһап була. Уның менән дөрөҫ эшләүгә колхозсылар тәүге көндә үк өйрәнделәр. Кантюков Фаяз, Яковлев Сергей кеүек күптәрҙең артынан хәҙер күҙ ҙә эйәрмәй.

Бөтә трасса буйынса намыҫлы хеҙмәт ҡайнай. Көндә һис туҡтауһыҙ Аллағуатҡа төрлө яҡтан ылау артынан ылау килә. Төрлө райондар, йөҙҙәрсә колхоздар — бөтәһе лә халыҡ төҙөлөшөнә сыҡты.

Ғ. Ибраһимов.

Эш темпы үҫә

Йомағужа районынан яңы тимер юл төҙөлөшөндә 750 йәйәүле һәм 80 ылау эшләй. Юл төҙөүсе колхоз бригадалары араһында социалистик ярыш киң ойошторолдо. Һөҙөмтәлә эш темпы үҫә бара.

Йомағужалылар беренсе көндәрҙә 700—750 кубометр күләмендә ер эштәре башҡарһалар, хәҙер темп икеләтә арттырылды: 13 июнда генә полотноға Йомағужа районы колхозсылары 1.500 кубометр балсыҡ ташып өйҙөләр.

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Башҡорт АССР-ының автогужевой юлдарын аяҡҡа баҫтырыу, төҙөү һәм ремонтлау саралары тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы Башҡорт АССР-ының автогужевой юлдарын аяҡҡа баҫтырыу, төҙөү һәм ремонтлау саралары тураһында мәсьәлә тикшерҙе. Был мәсьәлә буйынса конкрет саралар билдәләнде.

1948 — 1950 йылдар эсендә БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге юл управлениеһе һәм район Советтары исполкомдары 335 километр юл төҙөргә, республика һәм урындағы әһәмиәттәге 907 километр оҙонлоғонда юлға капиталь ремонт үткәрергә, 5900 метр оҙонлоғонда күперҙәр төҙөргә, 15 мең 690 метр оҙонлоғонда күперҙәргә һәм юлдағы торбаларға капиталь ремонт үткәрергә тейештәр.

Был ҡарарҙа: юлдар төҙөгәндә уларға эре һәм ваҡ таштар түшәүгә айырыуса иғтибар бирергә һәм 1948—1950 йылдарҙа таш менән түшәлгән 250 километр оҙонлоғондағы юлды эксплоатацияға биреүҙе тәьмин итергә, тип әйтелә.

Шулай уҡ ошо ҡарар нигеҙендә район һәм ҡала Советы исполкомдарына республика һәм урындағы әһәмиәттәге автогужевой юлдарҙы төҙөүгә, ремонтлауға һәм юлдарҙы ҡарауға МТС-тарҙың, совхоздарҙың һәм ярҙамсы хужалыҡтарҙың, шулай уҡ промышленность, транспорт предприятиеләренең, сауҙа һәм башҡа ойошмаларҙың, хужалыҡтарҙың йөк автомашиналарын йылына дүрт көн юлда эшләүгә ылыҡтырыу бурысы йөкмәтелә.

Юл төҙөлөшә эше буйынса билдәләнгән күләм заданиеләрен үтәү маҡсатында предприятие һәм ойошмаларҙың етәкселәренә 1948 йылдың 1 октябренә тиклем булған срокта юл төҙөлөшөндә өҙлөкһөҙ эшләүгә талап ителгән һанда автомашиналар биреп тороу тәҡдим ителә.

Район Советы исполкомдары председателдәре автомашиналарға тейәү һәм уларҙы бушатыу эштәрен башҡарыуға ҡаракле һанда кеше көстәре бүлергә, ә БАССР Министрҙәр Советы эргәһендәге юл управлениеһе работниктәре ошо маҡсатта даими эшсе бригадалары ойошторорға, автомашиналарҙың өҙлөкһөҙ эшләүен тәьмин итергә тейештәр.

БАССР-ҙың ауыл хужалығы Министерствоһына юл төҙөлөшө эшенә ярҙам итеү маҡсатында 1948 йылда гусеницалы дүрт һәм тәгәрмәсле 12 тракторҙы ремонт заводтарында һәм машина-трактор мастерскойҙарында ремонтлап биреү бурысы йөкмәтелә.

Юл управлениеһе һәм район Советы исполкомдары өлө юлларҙан промышленность, ауыл хужалығы һәм башҡа предприятиеләргә инә торған юлдарҙың торошон тикшереүгә һәм ошо йылдың 25 июненән дә һуҡламай ремонт талап ителгән юлдарҙың тәҙмәһен Министрҙәр Советына тапшырырға мәжбүр ителә. Промышленность, ауыл хужалығы һәм башҡа предприятиеләргә инеү юлларын ремонтлау был предприятиеләрҙең үҙ иҫәбенә үткәрелә. Был юлдар һәр ваҡыт төҙөк хәлдә тотолорға тейештәр.

1948 йылғы юл төҙөлөшө планында билдәләнгән төп эштәрҙе урожай йыйнау башланғанға тиклем үтәп сығыу маҡсатында ошо йылдың 15 июненән 15 июленә тиклем юлдар, күперҙәр төҙөү һәм ремонтлау айлығы үткәреү иғлан ителә.

Район Советы исполкомдары һәм ВКП(б)-ның район комитеттары өс көн срок эсендә һәр бер юл буйынса ауыл Советтары һәм колхоздар өсөн эш графиктары төҙөп раҫларға тейештәр. Шулай уҡ колхоз-ара юлдарын аяҡҡа баҫтырыу, ремонтлау графиген булдырырға һәм айлыҡта был юлдарҙы, күперҙәрҙе тулыһынса төҙөкләндерергә.

Айлыҡ осоронда юлда эшләүгә тейеш булған колхозсыларҙың һәм колхоз транспорттарының тулыһынса эшкә сығыуын ойошторорға.

Иғлан ителгән айлыҡта юл төҙөлөшөндә эшләүсе колхозсылар араһында политик-массовый эштәрҙе киң ойошторорға, колхоздар һәм бригадалар араһында социалистик ярышты киң йәйелдерергә, юғары хеҙмәт етештереүсәнлегенә һәм эштең яҡшы сифатлы итеп башҡарылыуына өлгәшергә кәрәк.

Сауҙа ойошмалары юл төҙөлөшөндә эшләүсе колхозсыларҙы көндәлек кәрәк тауарҙар менән өҙлөкһөҙ тәьмин итеп торорға, ә медицина органдары юлда эшләүселәрҙе санитария яғынан хеҙмәтләндереүҙе ойошторорға тейештәр.

Шулай уҡ был ҡарарҙа — ауыл Советтарына, колхоздарға юлдарҙы беркетергә һәм уларға юлдарҙы бөтә ваҡытта ла төҙөк хәлдә тотоу яуаплылығы йөкмәтелә, тип айырым рәүештә күрһәтеп үтелә.

Партия тормошо

ВКП(б)-ның Октябрьск ҡала комитетенең ыңғай тәжрибәһе

ВКП(б)-ның Октябрьск ҡала комитете былтыр коммунистарҙың, партияһыҙ совет һәм хужалыҡ эшсәндәренең эшләүсе етәксе кадрҙарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреү эшен яҡшыртыу буйынса байтаҡ уңыштарға өлгәште. Идея-политик кимәлдәрен күтәреү буйынса ҙур ярҙамды ҡала комитете ҡарамағындағы етәксе кадрҙар өсөн даими һәрәкәт итеүсе семинар һәм ҡала лекторийы ойоштороуҙа күрһәтте.

Был лекторий бик уңышлы эшләне. Ул кадрҙарҙа һәм ҡала интеллигенцияһында большевистик партия тарихын өйрәнеүгә лә, шулай уҡ СССР тарихын, рус әҙәбиәтен, донъяның һәм СССР илдәрен географияһын өйрәнеүгә ярҙам итеүҙе үҙенең маҡсаты итеп ҡуйғайны.

Ярты йыл эсендә лекторийҙа 25 лекция уҡылды. Уларҙың уныһы партия тарихына булды. Партия һәм Совет государствоһының юлбашсылары Ленин менән Сталиндың биографиялары тураһындағы лекцияларҙы айырыуса ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙырҙы. Шулай уҡ «Совет патриотизмы», «Коммунизм — бөйөк көрәш маҡсатыбыҙ», «Коммунистик мораль», «Государство тураһында марксистик-ленинсе учение» тигән лекцияларҙы ла халыҡ бик яратып тыңланы.

«Рус әҙәбиәтенең бөтә донъяла тотҡан әһәмиәте», «А. М. Горький», «Совет әҙәбиәте» темаларына һайланған лекцияларға бигерәк тә күп кеше йыйылды. Ҡалала әҙәбиәткә һәм искусствоға арналған лекциялар бик һирәк була ине. Был лекцияларға бик күп кеше килеүе факты әҙәбиәт һәм искусство буйынса яҡшы, әһәмиәтле лекцияларҙың күберәк уҡылырға кәрәклеген күрһәтте.

Лекторийҙа лекция тыңлаусыларҙың составы иҫәпкә алынды, бер үк кешеләрҙән торҙо. 28 лекцияға алдан уҡ абонемент карточкалары таратылды. Һәр бер лекцияла кәмендә 150 кеше булды.

Лекторийҙың унда йөрөүселәр өсөн ниндәй файҙа килтергәнлеген тыңлаусылар үҙҙәре һөйләйҙәр. Мәҫәлән, ижеке нефть промыселенән өлкән геологы иптәш Юрин былай ти:

— Мин лекторий үткәргән бөтә лекцияларҙы ла тыңланым. Улар минең бик күп белемдәремде тулыландырҙы. Лекторий миңә партия тарихын өйрәнеү буйынса системалы рәүештә эшләргә ярҙам итте, миңә СССР тарихе, ил экономикаһы иҙеләрен экономик һәм политик хәлдәре белемдәремде үҫтерҙе. Лекторий минең белемемде арттырыуға ныҡ ярҙам итте.

Ленин орденле «Туймазынефть» тресының техник бүлеге начальнигы иптәш Репин да шул уҡ фекерҙе әйтте.

Шулай итеп, лекторий Октябрьск ҡалаһындағы етәксе кадрҙарға һәм интеллигенцияға белемдәрен күтәреүҙә ҙур ярҙам итте.

И. Болдогоев.

Коммунистәр социалистик ярыштың башлап барыусылары

Белорет металлургия заводының мартен цехы беренсе квартал планын үтәп еткермәне. 1.600 мең һум аҡса артыҡ расходланды. Был хәл цех партия ойошмаһында ҙур тревога тыуҙырҙы. Планды үҙәлләү өсөн яуаплылыҡтың ҙур өлөшө партия ойошмаһына һәм коммунистарға төшә ине.

Апрель айында бөтә ил буйлап йәйелеп киткән Май алды социалистик ярышына ҡушылып, партия ойошмаһы цех коллективын план өсөн, экономия өсөн ныҡышмалы көрәшкә күтәрҙе. Партия ойошмаһы инициативаһы менән цехта стахановсы техник-экономик план төҙөлдө. Был план һәр бер сменала, агрегатта айырылып, цех производство кәңәшмәһендә ҡабул ителде. Коммунистар ошо планды ижад итеүселәр һәм унда ҡаралған ойоштороу һәм техник сараларҙы тормошҡа ашырыу өсөн ойоштороусылар булдылар.

Коммунист сталевар Хлесткин беренсе башлап тиҙләтелгән иретмәләр методы менән эшләй башланы. Уның бригадаһы апрель айы планын 146 процентҡа үтәп сыҡты. Йәш сталевар коммунист Хәсән Шәрәфетдинов та унан ҡалышманы. Ә май айында инде ул Хлесткинде байтаҡҡа уҙып та китте. Ҡалған сталеварҙар ошо ике алдынғы коммунистың өлгөһендә мейестәрҙең етештереүсәнлеген юғары күтәреү, экономиялы эшләү өсөн намыҫлы эшкә тотондолар. Ярҙамсы участкала эшләүсе коммунист-токарь иптәш Штыров көндәлек нормаһын 234,5 процентҡа үтәп бара. Мартен цехында коммунистар производство планын үтәү өсөн көрәштең хәл иткес участкаларына урынлаштырылғандар. Сталеварҙарҙың күпселеге — коммунистар. Улар бөтәһе лә производство пландарын арттырып үтәйҙәр. Копнов һәм Кошелев иптәштәр ҡаусыҡ сталеварҙар айлыҡ пландарын артығы менән үтәп, илгә пландан тыш йөҙәр тонна корыс иретеп бирҙеләр. Сифондар йыйнаусы Тимерханова, Байбурина иптәштәрҙең комсомолец-йәштәр бригадалары ла алғала эшләйҙәр.

Беҙ яңы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәүҙе цех коллективы алдына төп бурыс итеп ҡуйғанбыҙ. Партия ойошмаһының ныҡышмалы тәрбиә эше алып барыуы арҡаһында цехта социалистик ярыш көндән-көн киңәйә бара. Май айының планы срогынан алты көнгә алда үтәлде. Беҙ ҡалған айҙарҙа тағы ла яҡшыраҡ эшләп, беренсе квартал өҙөклөгән ҡаплау һәм йыллыҡ планды срогынан күп алда үтәп сығыу өсөн көрәшәбеҙ. Цех коммунистары был ныҡышмалы көрәштең башында торалар.

Н. В. Сулимов,
Мартен цехының парторгы.

Башҡорт АССР-ының бөтә колхозсыларына һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарына, МТС һәм совхоз работниктарына һәм ауыл хужалығы специалистарына

Совет Армияһында хеҙмәт итеүсе бер төркөм воиндарҙың МӨРӘЖӘҒӘТЕ

Беҙ, Совет Армияһының воиндары беҙҙең Иосиф Виссарионович Сталинға яҙған ҡатыгыҙҙы уҡып, әҫтәгеҙҙә алған йөкләмәләрегеҙҙе ҙур ҡыуаныс менән хупланыҡ һәм уларҙы уңышлы рәүештә үтәүегеҙҙе теләйбеҙ. Халыҡтар юлбашсыһы бөйөк Сталинға бирелгән вәғәҙә — Тыуған ил алдында, бөтә совет халҡы алдында бирелгән вәғәҙә ул. Был йөкләмәләр үтәлеү, уларҙы стахановсы эш менән нығытыу өсөн фиҙакәр рәүештә хеҙмәт итеү, уға үҙегеҙҙең бөтә талантлылығығыҙҙы, көсөгөҙҙө һәм белемегеҙҙе һалыу — һәр бер хеҙмәтсәнден намыҫ эше.

Хәҙер айырым колхоздар, МТС-тар, бригадалар, звенолар арыштың да ауыл хужалығы культураларының уңышын күтәреү өсөн көрәштә ниндәй бейеклеккә ирешкәнлеген, ниндәй ҙур уңыштарға өлгәшкәнлеген күрһәтә. Ярышыусылар менән бергә ҡулға алынған массовый һәм практик эштә ниндәй һөҙөмтәләр булырға тейеш.

Трактористар һәм комбайнерҙар, һабансылар һәм тырмасылар, һыйыр һауыусылар һәм һарыҡ ҡараусылар, агрономдар һәм зоотехниктар, ауылдарҙағы бөтә работниктар! Ауыл хужалығы культураларының уңышын күтәреү өсөн бөтә көсөгөҙҙө һалығыҙ! Юлбашсыбыҙ алдында биргән вәғәҙәгеҙҙе намыҫлы рәүештә үтәү өсөн көрәшегеҙ! МТС, совхоз, колхоз, партия, совет ойошмаларының етәкселәре, ауыл хужалығы органдарында эшләүсе работниктар, ярыштың уңышлы барыуын ойоштороу эштәрен алып барыу белеүегеҙҙә байланған. Колхоздарға, МТС-тарға һәм совхоздарға хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн кәрәк булған бөтә шарттарҙы булдырығыҙ! Баҫыуҙарҙа һәм малсылыҡ фермаларында хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуға өлгәшегеҙ, ауылда социалистик ярышты һәм стахановсылар хәрәкәтен бөтә саралар менән йәйелдерегеҙ, ауыл хужалығы работниктарын ярышта алдынғы етәкселек итегеҙ!

Коммунистар һәм комсомолецтар! Үҙегеҙҙең производстволағы шәхси өлгөгөҙ һәм большевистик туры һүҙегеҙ менән алынған йөкләмәләрҙе үтәүҙә инициатор һәм масса яғына әйҙәүселәр булығыҙ! Алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшкә ауыл хужалығы работниктарын тағы ла ныҡыраҡ туплау өсөн СССР Верховный Советы Президиумының юғары урожай алған өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм ордендар һәм миҙалдар менән награлау тураһындағы Указын тағы ла киңерәк пропагандалағыҙ! Быйыл башыуҙарҙан юғары урожай үҫтереү өсөн һәр бер колхозсының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙың һыҙланыу, тырышып эшләүенә өлгәшегеҙ! Иген ни тиклем күп булһа, Тыуған илебеҙҙең шул тиклем байыраҡ буласағын, уның обороноһы ныҡлыраҡ буласағын һәм хеҙмәтсәндәр тормошоноң тағы ла юғарыраҡ буласағын һәр бер хеҙмәтсәндең ныҡ аңлауына өлгәшегеҙ!

Беҙ, Совет Армияһының воиндары, үҙ ҡалыҡтарын намыҫ менән хеҙмәт итергә, беҙҙең тыныс ижади хеҙмәтегеҙҙе һаҡларға беҙҙән талап ителгән бурыстарҙы үтәргә ант итәбеҙ. Әгәр кәрәк булһа, телһә ниндәй минутта ла, телһә ниндәй шарттарҙа ла Тыуған илебеҙҙе — Совет Социалистик Республикалар Союзын дошмандан һаҡларға һәр ваҡыт әҙербеҙ.

Беҙ, халҡыбыҙҙың бөйөк юлбашсыһы иптәш Сталин алдында үҙ әҫтәгеҙгә алған йөкләмәләрегеҙҙе намыҫ менән үтәрһегеҙ тип ышанабыҙ.

Башҡортостан халҡының улдары
—Совет Армияһының воиндары:
старший лейтенант —
Н. Ш. Ғәлиев,
ефрейтор — С. Н. Кузнецов,
рядовой — В. Г. Ярмаркин.

Совхозда байрам

1947 йылда арыштан юғары урожай алыуға өлгәшкән ауыл хужалығы алдынғыларынан бер төркөм кешегә күптән түгел, Цюрупа исемендәге совхоз клубында СССР ордендары һәм миҙалдары тапшырыуға арналған кисә булып үтте.

Награлланыусылар исеменән совхоз директоры (Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордене менән награлланған) Елагин, өлкән механик (Ленин ордене менән награлланған) Макаров иптәштәр сығып һөйләнеләр. Улар Совет Хөкүмәтенең, большевиктар партияһының һәм иптәш Сталиндең ауыл хужалығы работниктары тураһында ҡайғыртыуҙары өсөн рәхмәт белдерҙеләр. Һәм 1948 йылда бөтә культуралар буйынса тағы ла юғарыраҡ урожай алырға, хөкүмәт награлдарына лайыҡлы булған алдынғыларҙың һанын арттырырға һүҙ бирҙеләр.

ССР Союзы Верховный Советы Президиумы исеменән, ВКП(б) Өлкә Комитеты һәм Башҡортостан Хөкүмәте исеменән иптәш Нигматжанов сығыш яһап, награлланыусыларҙы ҡотланы һәм уларҙың артабанғы эштәрендә тағы ла ҙур уңыштар теләне.

Цюрупа исемендәге совхозда был көн ҙур байрам төҫөн алды.

Советтәр Союзында

Мәскәүҙә Свердлов, Революция һәм Совет майҙандарында, шулай уҡ Мәскәүҙең үҙәк магистрале — Горький урамында быйыл әҙ 300 төптән артыҡ юкә ағасы ултыртылды.
Һүрәттә: Театральный проезд йәшелләндерелгәндән һуң.
И. Грановский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Грузияның иң бай колхозының производство-финанс планы

ТБИЛИСИ. (ТАСС). Махарадзе районының Берия исемендәге ауыл хужалығы артеле колхозсыларының дөйөм йыйылышы колхоздың ағымдағы йыл өсөн производство-финанс планын ҡабул итте. Артелдең аҡсалата килеме, 11 миллион һум тәшкил итә. Былтырғы йылдағыға ҡарағанда, миллион ярымға артыҡ, тигән һүҙ. Ағымдағы йылда бер хеҙмәт көнөнә аҡсалата 27 һум һәм биш килограмм иген тәшкил итәсәк. Колхоз тик сәй үҫтереүҙән генә 8.200 мең һум доход аласаҡ.

Планда хужалыҡ һәм культура-тормош төҙөлөштәренә ҙур сумма тотоуҙар ҡаралған. Капитальный эштәр өсөн барлығы ике миллион һум аҡса бүленгән. Йыл аҙағына ҡәҙәр мунса, балалар йәслеләре һалына һәм мал йорттары киңәйтеләсәк.

Бөйөк рус яҙыусыларының бронзанан эшләнгән скульптуралары

Советтар дворецен төҙөү управлениеһының экспериментал-художество мастерскойы бөйөк рус яҙыусыһы Л. Н. Толстойҙың скульптураһын бронзанан ҡойҙо. Лев Николаевичтең скульптураһы А. С. Голубкинаның билдәле «фекер эйәһе — Толстой» скульптураһына ҡарағанда бер ярым тапҡыр артыҡ ҙурлыҡта ҡойолған. Ул Ленинградтағы рус музейенә ҡуйыласаҡ.

Мәскәү скульпторы А. В. Бабуровтың моделе буйынса, Мытищиҙә бронзанан әйбер ҡойоу заводында, И. А. Гончаровтың бронзанан бюсын ҡойоу эше тамамланды. Был бюст яҙыусының тәбиғи ҙурлығынан ике тапҡыр артыҡ. Скульптура яҙыусының тыуған ерендә, Ульяновск ҡалаһында урынлаштырыласаҡ.

Электр тракторы эштә

АЧИТ, (Свердлов өлкәһе), (ТАСС). Ачит районының «Заря» колхозында электротракторҙы производствола һынау башланды. Беренсе эш көндәре яңы машинаның яҡшы сифаттарын күрһәтте. Бер трактор менән 13 гектар майҙан картуф ерен һөрөү, тырматыу һәм культивация үткәрелде. Ер 25—32 сантиметр тәрәнлектә һөрөлә.

Хәҙер тағы ла икенсе электротрактор эшләй башланы. Конструкторҙар — профессор Листов һәм инженер Стеценко иптәштәр яңы машиналарҙың эшенә күҙәтеү алып баралар.

Электр көсө, «Заря» колхозы баҫыуы аша үткән юғары вольтлы линиянан, көсәйеп бирелгән трансформатор, электр көсөн түбәнәйтеү станцияһына бирелә, унан кабель менән тракторҙарға килтерелә. Кабелдең оҙонлоғо 700 метр. Һәр трактор 1500 метр оҙонлоҡтағы һәм 400 метр киңлектәге участкала эшләй ала.

Бер йылда

ЗАПОРОЖЬЕ. (ТАСС). Днепрҙың шлюзаларын аяҡҡа баҫтырыуға бер йыл тулды. Был ваҡыт эсендә уның диңгеҙ ҡапҡаларынан меңләгән судно үтте. Хәҙер шлюзалар аша ай һайын, үҙгән йылға ҡарағанда, ике тапҡыр артыҡ, судноларҙар үтә. Һәр судноны шлюзалауҙың ваҡыты, уртаса алғанда, 54 минуттан 46 минутҡа тиклем ҡыҫҡартылды.

Совет төҙөлөшө

Яңыса эшләүҙең ҡайһы бер йомғаҡтары

Урындағы Советтарҙың эшенә депутаттарҙы һәм активты ылыҡтырыуҙың иң мөһим ойоштороу формаларынан береһе булып Советтарҙың даими комиссиялары иҫәпләнә. Уларҙың эштәрен дөрөҫ һәм планлы рәүештә алып барыуға Янауыл район Советы ныҡ иғтибар бирә. Районның ауыл Советтарында 120 даими комиссия ойошторолоп, уларҙа 379 депутат, район Советы ҡарамында ойошторолған 8 даими комиссия составында 34 депутат практик эш алып бара.

Был комиссияларҙың эштәре һайлаусыларҙың актив ҡатнашлығы менән алып барыла. Улар үҙ тирәләренә йыйҙарлаған активисте — районның иң күренекле кешеләрен: колхоз баҫыуҙарының алдынғыларын, агрономдарҙы, уҡытыусыларҙы, врачтарҙы һәм башҡаларҙы туплағандар.

Ауыл хужалығы даими комиссияһы (председателе район Советы депутаты иптәш Игнатов) район Советы башҡарма комитетына һәм уның ауыл хужалығы бүлегенең практик эшенә айырыуса яҡшы ярҙам итә. Был комиссия үҙенең эшендә районның артта ҡалған колхоздарын алдынғылар сафына сығарыуҙы төп бурыс итеп ҡуйҙы. Бының өсөн ул иң элек үҙенә эш планы төҙөнө. Пландың беренсе пункты итеп Әрлән ауыл Советы «Октябрь юлы», Вояды ауыл Советы «Марс» колхоздарының экономикаларын өйрәнеү һәм уларҙың ауыл хужалығы эштәрендә артта ҡалыуҙарының сәбәбен асыу мәсьәләһе ҡуйылды. Комиссия члендары планда күрһәтелгән был мәсьәләләрҙе хәл итеүгә ошо ике ауыл Советының үҙ депутаттарын, совет активын ылыҡтырҙылар. Тикшереү был колхоздарҙың тартыу көсө әҙ булыуын, экономик ярҙамға мохтаж булыуҙарын асты. Комиссия члендары ул колхоздарҙы алдынғылар сафына сығарыу өсөн күрелергә тейешле сараларҙы район Советы башҡарма комитеты алдына ҡуйҙылар. Ошо юл менән, уларға МТС-тан иң яҡшы тракторҙар һәм трактористар бирелеүгә, сәсеү орлоҡтары бирелеүгә өлгәшелде. Һөҙөмтәлә был колхоздарҙа сәсеү майҙанын арттырыуға, сәсеүҙе ваҡытында һәм яҡшы сифатлы итеп үткәреүгә өлгәшелде. «Октябрь юлы» колхозы үткән йыл 492 гектар иген сәскән булһа, быйыл — 637 гектар, «Марс» колхозы 405 гектар урынына, быйыл 548 гектар сәсте.

Ауыл хужалығы комиссияһы шулай уҡ малсылыҡ буйынса артта ҡалыусы колхоздарҙың эштәрен яҡшыртыу өсөн дә практик саралар күрә, уларҙың һәр береһенең эшенә дифференциаль рәүештә яҡын килеп, малсылыҡ фермаларының эштәрен яҡшыртыу юлдарын күрһәтә. Малсылыҡ буйынса бығаса артта ҡалған «Искра» һәм Молотов исемендәге колхоздарҙың эштәрен ауыл хужалығы комиссияһы үҙ контроле аҫтына алғайны. Комиссияның практик ярҙамы һөҙөмтәһендә был ике колхозда малсылыҡты үҫтереү планы арттырып үтәлде. Уларҙа мал һаны һуғышҡа тиклемге һандан байтаҡ артып китте.

Ауыл хужалығы комиссияһы хәҙер практик яҡтан өлгәшелгән ошо беренсе уңышлыҡтарҙы нығытыу өсөн планда билдәләнгән башҡа мәсьәләләрҙе үтәү юлында эшләй. Ул игендәрҙе тәрбиәләп үҫтереү, болондарҙы яҡшыртыу мәсьәләләрен, пар һөрөү буйынса МТС-тар менән колхоздар араһында төҙөлгән договорҙарҙың үтәлешен тикшерә, колхоздарҙа һәм МТС-тарҙа урожай йыйыуға әҙерлек, колхоздарҙа хеҙмәт ойоштороу, звено системаһы, эшләп сығарыу нормалары мәсьәләләре менән шөғөлләнә. Комиссия члендары был эштәрҙе үҙҙәре генә алып бармайҙар, уның тирәһенә 65 активист тупланған.

Һайлаусыларҙың биргән наказдарында район үҙәген һәм райондағы юлдарҙы төҙөкләндереү мәсьәләләре төп урынды ала ине. Культура-тормош комиссияһы председателе район Советы депутаты иптәш Шәйдуллин һайлаусыларҙың наказдарын үтәү буйынса ниндәй эштәр эшләүе тураһында район Советының икенсе сессияһында отчет яһаны. Был комиссия, совет активе ярҙамында, субботниктар ойошторҙо. Был субботниктар көсө менән һәм башҡа средстволар табып, районда 31 урында яңы ҡойо ҡаҙылды, район үҙәгендә 5872 төп, ауыл ерҙәрендә 17.560 төп ағас ултыртылды. Юл төҙөлөшө комиссияһының инициативаһында Янауыл — Тәпләкә юлындағы Ҡайманы, Ковегово йылғалары аша, шулай уҡ Янауыл — Тәтешле юлында яңы күперҙәр һалынды. Бынан тыш, урман һәм баҫыу юлдарында 32 күпер төҙәлде һәм 42 күпер ремонтланды.

Культура-тормош комиссияһы Ватан һуғышында һәләк булған иптәштәрҙең, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларына һәм инвалидтарға ярҙам итеү мәсьәләһенә лә ҙур иғтибар бирә. Улар өсөн 20 йорт һалынды, 60 өйгә ремонт яһалды.

Район Советының финанс-бюджет комиссияһы ла практик эштә актив ҡатнаша. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм уны үҫтереү буйынса өсөнсө государство заемына аҡса йыйнау планы районда май айында уҡ тулыһы менән үтәлде. Был эштә Можга ауыл Советының финанс-бюджет даими комиссияһы айырыуса яҡшы эшләне. Унда хеҙмәтсәндәр араһында заем таратыу һәм уға аҡса йыйнау эше 2 көн эсендә тамамланды — государствоға бурысҡа 60 мең һум аҡса тапшырылды.

Район Советының халыҡ мәғарифе, һаулыҡ һаҡлау һәм сауҙа эштәре буйынса даими хәрәкәт итеүсе комиссиялары ла эште ойошҡан рәүештә алып баралар.

Район Советы башҡарма комитеты район Советының һәм ауыл Советтарының сессияларын ваҡытында үткәрә бара. Сессия булырҙан бер ай алда тейешле әҙерлек саралары күрелә. Сессия ҡарамағына ҡуйыласаҡ мәсьәләләрҙе әҙерләүгә депутаттар һәм совет активы ылыҡтырыла. Сессияларҙың эштәрендә депутаттар ҙур активлыҡ менән ҡатнашалар. Мәҫәлән, беренсе сессияла ҡатнашыусы 54 депутаттан көн тәртибендәге мәсьәләләрҙе тикшергәндә 18 депутат, икенсе сессияла — 20 депутат сығыш яһаны.

Район Советы исполкомы ауыл Советтарының сессияларын үткәреүҙә яҡындан ярҙам итә. Исполком члендары ауыл Советтарының сессияларында үҙҙәре ҡатнашалар.

Бында сессияларҙа ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың үтәлешен тикшереү эше лә яҡшы ҡуйылған. Был эшкә депутаттар һәм совет активе ылыҡтырыла. Район Советы депутаттарының күбеһе үҙҙәренең эштәре тураһында һайлаусылар алдында отчет яһайҙар.

— Беҙҙең районда фиҙакәр рәүештә эшләүсе, инициативалы депутаттар күп, — ти район Советы исполкомы председателе иптәш Кәримов. — Эште дөрөҫ файҙаланғанда, уларҙың практик ярҙамдары ғәйәт ҙур. Беҙҙең район Советы һәр бер депутаттың үҙ һайлаусылары менән бәйләнешен нығытырға ҡарар итте. Бындай бәйләнеш формаларының береһе булып депутаттарҙың үҙ һайлаусыларын ҡабул итеүҙәре һанала. Район Советының ҡайһы бер депутаттары был эште яҡшы ойошторҙолар. Мәҫәлән, депутат иптәш Дмитриева Н. Г. үҙе һайланған 57-се номерлы округта һайлаусыларҙы ҡабул итеү өсөн урын һәм ваҡыт билдәләне. Был эште һәр бер депутаттың үткәреүенә өлгәшергә кәрәк. Ул хеҙмәтсәндәр массаһы менән бәйләнеште нығытыуға ярҙам итә, хеҙмәтсәндәрҙең жалобаларын һәм ғаризаларын тикшереп, ерена еткереүҙе тиҙләтә.

Район Советы бүлектәренең һәр ҡайһыһының исполком тарафынан раҫланған эш планы бар. Шуға күрә улар һәр бер мәсьәләгә исполком ултырышында ҡуйырға ашыҡмайҙар, ә, киреһенсә, уларҙы үҙҙәре хәл итеү сараһын күрәләр. Бүлектәр район Советының даими комиссиялары менән тығыҙ бәйләнештә эшләйҙәр: уларҙың эш пландары менән танышалар, бүлек работниктарының ҡатнашлығында сығарылар, һайлаусылар тарафынан бирелгән наказдарҙың үтәлешен тикшерәләр.

Урындағы Советтарға һайлауҙар ваҡытында һайлаусылар тарафынан бирелгән 125 наказдың 64-е үтәлгән һәм уларҙың ҡалғандары ла үтәлеү өҫтөндә. Мәҫәлән, Иҫәгут ауылында ете йыллыҡ мәктәп, Зирка, Зәйнев, Юғары һәм Әмзә ауылдарында 4 башланғыс мәктәп һалына башланы, 22 мәктәп ҡаршында спорт майҙаны төҙөлә, колхоздарҙа 2000 балаһы эсенә алырлыҡ балалар йәслеләһе асырға әҙерлек алып бара. Буй йылғаһына гидроэлектростанция һалыу эше ошо көндәрҙә тамамланасаҡ.

Район Советының ойоштороу-массовый эштәрҙе яңыса алып барыуы һөҙөмтәһендә өлгәшелгән уңыштары бына шулар. Былар, район колхоздарының яҙғы сәсеү эштәренең уңышлы рәүештә тамамланып, районның республикала алдынғы урындарҙың береһен алыуын да әҫтән алып, урындағы Советтарҙың ойоштороу-массовый эштәрҙе дөрөҫ алып барыуҙарының ни дәрәжәлә әһәмиәтле булыуын тағы ла асығыраҡ күрһәтә.

Ә. Вали[illegible]

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының инструкторы.

Комбайндар ремонты темпын һәм сифатын ҡырҡа күтәрергә!

Бер генә комбайн да ремонтланмаған

— Урожай йыйыуға әҙерләнәбеҙ, — тине һүтелеп ташланған комбайн частарын йыйныусы Александр Николаев. — Ләкин эштең барышы мактарлык түгел. Аны тезлеләргә комбайндарға күп да теймәгән әле, — тип МТС усадьбаһында үлтырған комбайндарҙы күрһәтте.

— Быша шатундар... балта остаһы кулы теймәгән уларға, — тип дауам итте ул. — Сей ағастан эшләнгән шатундар һыналар. Үткән йылда комбайнер Исмәғил Мырзабулатовтың 25 гектар майҙандағы арышты 20 көн буйы йыйныуы ла шунан. Беҙҙең МТС-та комбайндарҙың ағас материалдарын бер генә йылды ла балта остаһы эшләгәндәре юҡ.

Ремонтсы иптәш Николаевтың был һүҙҙәре Абҙан МТС-ында комбайндар ремонтының барышын да һәм сифатын да дөрөҫ характерлай.

МТС етәкселәре һәм механиктары ремонтсыларҙың эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар, уларға практик ярҙам күрһәтмәйҙәр. Ремонтсылар хатта көндәлек эш нормаларын күпмегә үтәүҙәрен дә белмәйҙәр. Йәш егет токарь иптәш Петр Жильников көндәлек эш нормаһын 175—200 процентҡа үтәй. Ләкин уҙай стахановсыларҙың эш өлгөләре башҡаларға күсерелмәй.

Комбайнерҙар араһында агитация-массовый эш алып барылмай. Агитаторҙар мастерскойға бармайҙар. МТС директорының политик эштәр буйынса урынбаҫары иптәш Ишбулатов ремонтсылар араһында социалистик ярыш ойоштороу, хеҙмәт дисциплинаһын һыҡтыу сараларын күрмәй. Эш шарттары тыуҙырылмаған. Комбайнерҙарҙан Ғаяз Мәлеков, токарь Петр һәм Михаил Жильников иптәштәр квартира бүлмәгәнлектән, ҡупырға 5—6 километр алыҫлыҡтағы ауылдарҙа өйҙәренә ҡайтып йөрөйҙәр.

МТМ-да бер генә тимерсе эшләй. Ул да трактор бригадаларынан ватылып килгән трактор частарын ремонтлауҙан бушамай. МТМ мөдире Жильников һәм комбайндар буйынса механик Бәһлаев иптәштәр ремонтсыларҙы ваҡытында запас частар менән тәьмин итмәйҙәр. Комбайнерҙар эшкә һуң сығалар, тәшкә лә ваҡытында ла икешәр сәғәт йөрөйҙәр. Уларҙың эшенә контроль яһалмай.

Һуңғы көнгә тиклем комбайндар ремонтлау үҙ ағышы менән бара. Хатта график тә һәм дефект ведомосте лә төҙөлмәгән. Шул арҡала Абҙан МТС-ында 17 комбайндың берәһе лә ремонтланмаған. Күп кенә комбайндар әле булһа МТС усадьбаһына ла килтерелмәгәндәр. Быны был фактылар бөтәһе лә МТС етәкселәренең конкрет етәкселек итмәүҙәрен, был мөһим эште үҙ ағышына ташлауҙарын күрһәтә. Улар быйыл да, үткән йылдағы кеүек үк, комбайндар ремонтлауға урожай йыйнау алдынан ғына башларға уйлайҙар.

К. Сафин.

Хеҙмәт ойошторолмаған

УСТЬ-ИКИН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Урожай йыйнау ваҡыты яҡынлаша. Ләкин Усть-Икин МТС-ында 36 комбайндың әле тик 9-ы ғына ремонтланды. Комбайн моторҙарын ремонтлау эше айырыуса насар бара. Ни барыһы 20 мотор әҙер. Ә 10 мотор Вәрә ремонт заводында ята. Тағы ла 6 мотор етешмәй. Запас частарҙың етешмәүе йыл башында уҡ билдәле булыуға ҡарамаҫтан, МТС директоры иптәш Соловьев бер ниндәй ҙә хәстәрлек күрмәне.

Шулай уҡ комбайнер кадрҙарын әҙерләү эшенә лә иғтибар ителмәй. 6 комбайн агрегаты өсөн комбайнерҙар һәм ярҙамсылар юҡ.

МТС-та комбайнерҙар әҙерләү эше менән шөғөлләнмәү менән бергә, булған комбайнерҙарҙың да хеҙмәте ойошторолмаған. Комбайнерҙарҙан һәм уларҙың ярҙамсыларынан 55 кеше көн һайын ремонтҡа эшкә киләләр. Ләкин уларҙы етәкселек юҡ, смена аҙағында бирелмәй.

— Беҙ норманы белмәйбеҙ, беҙҙең хеҙмәтебеҙ нисек түләнер икән? — ти комбайнер Ҡорбанов.

МТМ мөдире Крючков һәм комбайндар механиге Ладыгин иптәштәр комбайнерҙарҙың хеҙмәтен ойоштороу эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Ремонтсылар араһында политик-массовый эштәр алып барылмай. МТМ янында ҡыҙыл мөйөш бар, ләкин ул һәр ваҡыт бикле тора.

Н. Ғалимов.

Республика МТС-тарында комбайндар ремонтының барышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 10 июненә, процентҭарҙа)

1. Бөжәр	100	59. Биишбүләк	33
2. Дүртөйлө	80	60. Моторный	33
3. Ташлыкүл	80	61. Сыкташтамаҡ	33
4. Аксен	75	62. Асҡын	32
5. Шаран	75	63. Ҡорос	32
6. Подгорный	74	64. Күзәй	32
7. Рәжәп	68	65. Ходайбирҙин	32
8. Кушнаренко	67	66. Петровск	31
9. Октябрьск	65	67. Әбдрәзаҡ	30
10. Ташлы	65	68. Арыҫлан	30
11. Туймазы	64	69. Дыуан	30
12. Чапаев	64	70. Ерекле	30
13. Маҡар	61	71. Күтәрсев	30
14. Байкы	59	72. Таутәмән	29
15. Яңауыл	59	73. Арҡауыл	27
16. Мәэкә	58	74. Ермолаевка	27
17. Иглин	56	75. Мишкә	27
18. Аслыкүл	55	76. Базан	26
19. Бәкалы	55	77. Үләй	26
20. Дәүләкән	54	78. Маләүез	25
21. Шаранлы	54	79. Усть-Икин	25
22. Туҡмаклы	53	80. Абзан	24
23. Акт	50	81. Ҡарыш	24
24. Бөрә	50	82. Иәнйегет	24
25. Ҡандра	50	83. Малаяз	23
26. Ҡушнаға	50	84. Ҡырмыҫҡалы	23
27. Нуриман	50	85. Покровка	23
28. Байғужа	48	86. Усень-Ивановка	23
29. Елдар	48	87. Ҡалмыҡ	23
30. Хәйбулла	48	88. Һаҡмар	23
31. Буздәк	47	89. Баймаҡ	20
32. Саҡмағош	47	90. Булгаҡ	20
33. Ҡариҙел	46	91. Иәрмәкәй	20
34. Стәрлетамаҡ	46	92. Охлебинин	20
35. Белоҡатай	46	93. Забельск	20
36. Урмиҙа	45	94. Таймас	20
37. Мрак	45	95. Благовар	19
38. Мәсәтле	45	96. Андреевка	18
39. Күрәем	45	97. Приют	18
40. Ямады	44	98. Стәрлебаш	18
41. Ҡарламан	43	99. Учалы	18
42. Ҡасәү	43	100. Матрай	17
43. Федоровка	43	101. Һурәк	17
44. Степной	42	102. Шаран	17
45. Михайловка	41	103. Балабәй	15
46. Кыйғы	41	104. Калинников	15
47. Сүйынсы	41	105. Чурай	15
48. Ишас	39	106. Байрамғол	14
49. Ҡалтасы	39	107. Дмитриевка	13
50. Мәсәғүт	38	108. Байыш	11
51. Орлов	37	109. Теләкәй	11
52. Борай	36	110. Йылайыр	11
53. Пугачев	36	111. Әлмөхәмәт	7
54. Имәнлекүл	36	112. Краснохолм	7
55. Услы	35	113. Ново-Троицк	5
56. Степановка	35	114. Шишмә	5
57. Ярослав	35	115. Балтач	4
58. Иәркәй	34		

Элеватор иген ҡабул итеүгә яҡшы әҙерләнә

Дәүләкән элеваторы (директоры иптәш Борота) үҙған йыл иген ҡабул итеүгә өлгөлө әҙерләнеп, республикала беренселекте алғайны. Быйыл да элеватор коллективе Стәрлетамаҡ элеваторы менән социалистик ярышҡа сығып, яңы урожай игенен ҡабул итеүгә әҙерлек эштәрен киң йәйелдерҙе.

Суслкаларҙы, склазтарҙы, элеватор территорияһындағы таш һәм тимер юлдарҙы ремонтлау башланды. Склазтарға дезинфекция яһалды. Лаборатория һәм әҙәк пункттар өсөн инвентарҙар, үлсәүҙәр әҙерләнә.

Элеваторҙы ремонтлау буйынса цехтар араһында ярыш бара. Ремонт буйынса май айында план 110 процентҡа үтәлде. Слесарҙарҙан Бондаренко, Чалых, Бойко иптәштәр эш нормаларын 120—130 процентҡа үтәйҙәр. Иген ҡабул итеү өсөн 18 кеше курста уҡый. Күп кенә лаборанттар әҙерләнә.

Дәүләкән элеваторы коллективе иген ҡабул итеүгә әҙерлекте 5 июлгә тамамлау өсөн көрәшә.

Ғ. Идрисов.

Лағыр совхозы планды арттырып үтәне

МАЛАЯЗ. (Телефон аша). Лағыр совхозы коллективе быйыл яҙғы сәсеү планын иртә срокта тамамлау менән, пар һөрөү эшен яҡшы ойошторҙо.

Арыш сәсеү өсөн 680 гектар пар күтәрелергә тейеш булһа, бында 780 гектар ер һөрөлдө. 100 гектар ер ҡара пар булып ҡаласаҡ, ул 1949 йылда яҙғы бойҙай сәсеү өсөн файҙаланыласаҡ.

Пар һөрөүҙә Торналы фермаһы алда бара. Бында эшләгән иптәш Куприянова етәкселек иткән бригаданың трактористары Местников һәм Брагин иптәштәр смена нормаларын һәр ваҡыт 150—200 процентҡа үтәйәләр.

К. Фәхретдинов.

СТАЛИН СТИПЕНДИАТТАРЫ



Юғары уҡыу йорттарында экзамендар башландылар. Хәҙер һәр бер студент ныҡышмалы эш өҫтөндә. Авиация институтында ла шундай уҡ хәл. Институттың алдынғы студенттәре—Сталин стипендиаттары бөтә студенттәргә өлгө булырлыҡ күрһәткестәр бирәләр, үҙ эшмәкәрлек үрнәктәре менән башҡаларҙы ла дәртләндерәләр.

Бына бишенсе курс студенте Рифат Мәүлютов. Ул бөтә биш йыл буйына Сталин стипендияһы алып уҡып килә. Был уңышҡа Рифат китап ятлап түгел, бәлки, ныҡышмалы эш, ваҡытын дөрөҫ ойоштора белеү, белемен һәр яҡтан тултыра барыу арҡаһында өлгәшә. Рифат Мәүлютов — общественник тә: башта группала комсорг, унан институттың профсоюз ойошмаһы председателе. Ул, институтта уҡыу менән бер үк ваҡытта, ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитеты эргәһендәге марксизм-ленинизм кискe университетын тик отлично билдәләре менән тамамланы. Партия члены иптәш Мәүлютов художество әҙәбиәтен уҡырға, общественный эштәрҙә актив ҡатнашырға өлгөрә, шул уҡ ваҡыт, үҙен булаҫаҡ специалист итеп тә яҡшы әҙерләй.

Бына икенсе студент — Сталин стипендиаты Генадий Панков. Ул ауыр һуғыш юлы үтеп, дошманды үҙ өйөндә тар-мар иткәндән һуң, институтта уҡый башланы. Уның батыр һуғышсы булыуы тураһында күкрәгендәге бер нисә орден һәм медалдар асыҡ һөйләп тора. Ул һуғыш шарттарында Ленин—Сталин партияһы сафына инде.

Өс йыл инде Сталин стипендияһы алып уҡыусы Г. Панков иптәш тә, Р. Мәүлютов кеүек үк, яҡшы общественник — институтта партия ойошмаһы секретарының беренсе урынбаҫары. Ул, институтта уҡыуҙан тыш, марксизм-ленинизм кискe университетының философия бүлеген тамамланы. Панков иптәш үтелгән материалды шул уҡ көндә китап буйынса ҡабат ентекле өйрәнеп, нығыта бара.

Ул марксизм-ленинизм теорияһын тәрән рәүештә үҙләштереүен дауам итә; рус һәм бөтә донъя художество әҙәбиәте классиктарын, хәҙерге совет әҙәбиәтен күп уҡый.

Рифат Мәүлютов менән Генадий Панков иптәштәр тәүге экзамендарҙы уңышлы бирҙеләр ҙә инде. Уларҙың исемдәре менән авиация институтының бөтә студенттары ғорурлана.

Салауат Тупеев.

Йыр һәм бейеү ансамбле эштә

Белорет металлургия заводының культура дворецы эргәһендә өс йыл инде башҡорт-татар йәштәренән ойошторолған үҙешмәкәр түңәрәк йәшәп килә. Уның ҡырҡтан артыҡ члены бар. Уларҙың күпселеге стахановсы йәштәр.

Түңәрәк йыш ҡына завод эшселәре һәм ҡала хеҙмәтсәндәре алдында бәләкәй пьесалар, төрлө концерт номерҙары менән сығыштар яһай. Ул 1946 йыл йыр һәм бейеү ансамбленә әйләндерелде.

Ҡала Советының ҡарары буйынса, ансамбль 11 кешелек агитбригада төҙөп, йәйге баҫыу эштәре осоронда Әбйәлил районы колхоздарын хеҙмәтләндереү өсөн ебәрҙе. Ул күп кенә колхоздарҙа булып үтте һәм эшен уңышлы рәүештә дауам итә. Бригада колхозсылар араһында төрлө темаларға беседалар үткәрә, концерт номерҙары бирә һәм завод комсомолецтары тарафынан бүләк итеп ебәрелгән ауыл хужалығы машиналары частарын колхоздарға тапшыра.

Локман Хәким

Мин девонлы ерҙән

(Полкташыма хат)

Ысын һалдаттарса татыу инек,
Кер юҡ ине беҙҙең дуҫлыҡта.
Ҡайҙаһың һин хәҙер, уңған егет,
Ҡайҙаһың һин хәҙер, полкташ?
Мин юғалттым һине...
Львов урамында
Айырылғандан бирле юғалттым!
Үтеп киттең ул саҡ минең яндан,
Теҙгендәрен ҡағып күк аттың...
Әҙләмәнем, бик-бик һағынһам да,
Беләм инем: минең полкташ
Байраҡ йөрөтөр һәр саҡ саф
алдыкда.
Батыр егет үҙен һынатмаҫ.
Ғәжәпләнмә, дуҫҡай, кисер мине,
Әгәр, бөртөк йәшем тамыҙып,
Үпһәм бөгөн һинең һүрәтеңде,
Үпһәм ябай гәзит ҡағыҙын...
Йылмайыу ҙа, ҡараштар ҙа таныш,
Тик яңыса бөгөн ир даным:
Урындар ҙа таныш:
Туймазы һәм Нарыш...
Девонсыға Ленин ордены!
Ҡулбашына һуғып, әүәлгесә,
Килде һине, дуҫҡай, маҡтаһым;
Хәтерләйем, ҡай саҡ: «Эх, Фәнисә!»
Тип блиндажда һике таҡтаһын
Соҡой-соҡой, штык осоң менән
Яҙҙың һин шул ғәзиз исемде.
Бөтә донъя гүйә шул исемдә,
Иң мөһиме гүйә шул ине...
Беләм инем һалдат ҡапсығында,
Старшина күҙенән йәшереп,
Патрондар менән НЗ янында
Губкин атлы ғалим кешенең
Китабын илттең бөтә фронт
буйлап,
Мөмкин булған бөтә урында,
Кәрәгенә һалып, ниҙер уйлап,
Һыҙа инең төрлө чертеждар...
Хәтерендәләр, хәбәр килгәс, хатта,
Старшинаға әйттең шатланып:
«—Күтәргәндәр, тиҙәр, беҙҙең якта
Фәнисәләр девон фонтанын!»
Гүйә иң бәхетле ата инең,
Шағир инең һин шул минутта.
Был хәбәрҙе, һалдат еңеүендәй,
Һөйләп йөрөнөләр полкта.
Девон фонтандары менән үҫеп,
Һалдат намыҫын эштә аҡлағас,
Ғәжәпләнмә, әгәр өҫтәл өҫтөң
Полкташтар хаты ҡаплаһа.
Бер ҡаләмдән ашап беҙ, икәүләп,
Күпме юлдың буйын буйланыҡ?
Һин бар ерҙә: окоп төбөндә лә
Фонтан бейеклеге уйланың.
Тағы осраштыҡ. Тағы күҙ алдымда
Фәнисә һәм һинең һүрәтең.
Полкташ дуҫ, һаумы? Был хатымда
Барһын ҡотлауҙары йөрәктең!
Белһәң ине, ҡыуаныслы инсек,
Уҙған һайын тимер юлынан:
Паровоз түгел, һин илтәһең кеүек,
Байраҡ тотоп көслө ҡулыңа!

Индивидуаль йорт һалыусыларға ссудалар

Өфө ҡалаһы Молотов районында хеҙмәтсәндәр индивидуаль йорттар һалалар.

Хөкүмәт уларға ҙур ярҙам күрһәтә. Ағымдағы йылда индивидуаль йорт һалыусы Ватан һуғышы инвалидтарына 60 мең һум ссуда бирелде.

Һыу стадионында

Өфө «Динамо» спорт обществоһының Ағиҙелдәге һыу стадионында кәмә станцияһы асылды. Унда һыу спортын һөйөүселәр өсөн 20 кәмә булдырылды.

Завод ҡыҙы

Завод. Цех. Фрезерный станоктар. Һәр бер станок янында һылыу-һылыу ҡыҙҙар. Улар, бер көйгә зырлап әйләнеп торған станоктар ыңғайына, йылдам хәрәкәттәр яһап, бер ритм менән эшләйҙәр. Бында тәртипһеҙ хәрәкәттәргә, бушҡа сыуалыуҙарға урын юҡ. Кешеләрҙең бөтә көстәре, бөтә уйҙары тик бер нәмәгә — сифат һәм һан яғынан урынына еткереп эшләнгән деталдәр эшләп сығарыуға йүнәлтелгән. Бында эшсе синыф үҙенең Совет государствоһын тағы ла ныҡытыу өсөн тырышып эшләй. Былар бөтәһе лә Нинаның күңелен шатландыралар. Нина үҙенә ҡанаттар үҫкән кеүек тоя. Осорға йыйынған ҡош шикелле ярһып, эшкә тотона.

— Ах, ниндәй бәхет!—ти Нина. Ул теләгенә ирешә. Ошо бөгөн, тырыш эшселәр коллективенең члены булып алды.

Уның станогына йәнәш кенә Аня Кольцова тигән ҡыҙҙың станогы тора. Зәңгәр күҙле, ҡаҡса кәүҙәле, баҫынҡы, Аня тәү осрашыуҙа уҡ Нинаның күңелен үҙенә тартты. Цех мастеры Аняға күрһәтеп:

— Бына, цехтың иң алдынғы фрезеровщицаһы. Ул ярышта еңелеүҙе, артта ҡалыуҙы белмәй. Унан өйрән,—тине.

Нина уның эш методтарын, тәжрибаләрен өйрәнергә тотонды. Уның алдынғы стахановка булыуының серен төшөнергә тырышты. Йәш ҡыҙҙың иғтибарлы күҙҙәре стахановканың һәр бер хәрәкәтен, һәр бер эшен ентекләп күҙәттеләр. Уның уңышында ниндәй ҙә булһа бер ғәжәп сер барҙыр кеүек тойолдо уға. Ләкин Аняның эш нормаһын һәр ваҡыт арттырып үтәүендәге сере ҡатмарлы түгел.

Аня үҙ станогын яҡшы белә. Уның ҡеүәтенән тулыһынса файҙалана. Станогын һәр ваҡыт майлап, таҙа итеп тота. Эш сәғәтендә бушҡа ваҡыт әрәм итеү, станоктың туктап тороуына юл ҡуйыу кеүек насар эштәрҙән алыҫ тора. Ул тыныс һәм бер тигеҙ ритм менән эшләй. Эш сәғәтенең бөтә 480 минутын тулы файҙалана.

— Бына ҡайҙа уның уңышының сере,—тип уйлай Нина һәм ул үҙе лә тап шул метод менән эшләй башлай. Күп тә үтмәй үҙенә өлгө булған, үҙе өйрәткән дуҫы Аня менән ярышып эшләргә тотона. Ике дуҫ—ике комсомолка араһында социалистик ярыш башлана.

Аня көндәлек эш нормаһын йөҙ процентҡа үтәһә, Нина уны йөҙ илләгә еткерә. Ә Аня инде уны ике йөҙгә күтәреп ҡуя. Нина тағы ла унан уҙырға тырыша. Шулай итеп ике дуҫ смена һайын береһенән береһе уҙып китеү өсөн ярышып эшләйҙәр. Һәм был ярыш бер нисә йылдарға һуҙыла һәм алмаш-тилмәш еңеү килтерә. Заводтың партия һәм комсомол ойошмалары уларға дөрөҫ юнәлеш биреп, улар өлгөһендә башҡа йәш эшселәрҙе тәрбиәләйҙәр.

Һуғыш йылдарында ла норманы арттырып үтәмәй тороп станок янынан китеүҙе белмәгән был йәш патриоткалар сәғәт менән дә, арыу-талыу менән дә иҫәпләшмәй эшләйҙәр. Тыуған иленә булған сикһеҙ мөхәббәт комсомолка Нинаның йөрәгенә бәтмәҫ-төкәнмәҫ көс бирә. Ул һәр сменала өстән дә кәм түгел норма үтәй. Ошо йылдарҙа инде ул үҙенең дуҫы Аняны ла алыҫта ҡалдырып китә.

Заводтың һәр бер эшсеһе уның тураһында хөрмәт һәм ғорурлыҡ менән һөйләй:

— Беҙҙең Нина заводта беренсе стахановка ул,—ти береһе. — Бер үҙе ике-өс кешенең эшен эшләй ҙә ҡуя ул, — тип ҡеүәтләй икенсеһе.

— Хөкүмәт уны, «Кызыл йондоз» ордены менән тиккә генә награламаны шул,—тип өҫтәй өсөнсөһө.

Бынан ун өс йыл элек заводҡа килеп ингән ун алты йәшлек ауыл ҡыҙы Нина хәҙер инде юғары квалификациялы, стахановсы эшсе. Ул ВКП(б) члены. БАССР Верховный Советы депутаты, Верховный Совет Президиумы члены.

Нина Ивановна инде ошо фрезерный цехта смена мастеры булыу юғарылығына күтәрелде.

— Хәҙер минең бөтә теләгем,—ти ул, — миңә эшкә өйрәткән, үҙ эшемең ысын оҫтаһы булып алған, хөрмәтле мастерҙар кеүек булып етешеү өсөн көрәшеүҙән тора. Мин бөтә көсөмдө шуға һалаҫаҡмын.

Ул үҙенең дуҫы, стахановка Аня Кольцова тураһында ысын күңелдән йылылыҡ һәм хөрмәт менән һөйләй:

— Аня һаман да беҙҙең цехтың алдынғы стахановкаһы. Ошо көндә лә ул бер үҙе дүрт станокта эшләй. Эш нормаһын икеләтә, өсләтә арттырып үтәй,—ти ул.

Стахановка Нина йәш эшселәрҙе тәрбиәләүгә лә күп көс һала. Үҙенең эш тәжрибәһе менән уртаҡлаша. Уларҙың эштәрендә ярҙамлаша. Ул өйрәткән йәш эшсе Аня Ярева нормаһын һәр ваҡыт арттырып үтәй.

Ошолай итеп Нина Поликарпова заводта ябай ауыл ҡыҙынан стахановсы эшсе, алдынғы мастер һәм государство деятеле булыу дәрәжәһенә тиклем үҫте.

Был турала һүҙ барғанда Нина Ивановна бәхетле йылмайып былай ти:

— Мин үҙемдең уңышымда иң элек мине тәрбиәләп үҫтергән Ленин—Сталин комсомолына, хәҙер үҙем уның члены булып торған большевиктар партияһына бурыслымын. Тик беҙҙең Совет илендә генә ябай эшсе ҡатындың хеҙмәтенә ошондай ҙур баһа бирелеүе мөмкин. Тик беҙҙең совет илендә генә һәр кемгә үҙ маҡсатына ирешергә бөтә юлдар асыҡ. Мин ошо теләгемә ирешеүем менән бәхетлемен.

— Мин, — ти Нина, — йәштән йәтим ҡалдым. Завод мине кеше итте. Үҙемдең илем өсөн кәрәкле кеше булыуымды ошо заводта тойҙом. Завод минең икенсе әсәм булды. Һәм мин унда киләсәктә бөтә көсөм, йәнем-тәнем менән хеҙмәт итәсәкмен.

Нина Ивановнаның яҡты ҡарашлы, аҡыллы күҙҙәренә, күп йыллыҡ намыҫлы, данлы хеҙмәт менән ныҡынған тығыҙ беләктәренә ҡарайһың да:

— Эйе, ул Тыуған ил алдындағы бурысын һәр ҡасан, һәр ерҙә аҙағына тиклем үтәйәсәк, уның бөтә тормош юлы быған шаһитә булып тора, тигән һығымтаға киләһең.

Зәйнәп Биишева.

Халыҡ-ара күҙәтеү

СССР—бәләкәй илдәрҙең тоғро дуҫы

Финляндияның, Румынияның һәм Венгрияның репарацион түләүҙәренең ҡалған өлөшөн яртылаш кәметеү тураһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары был илдәрҙең хөкүмәттәре һәм халыҡтары тарафынан ғына түгел, бәлки бөтә донъяның демократик общественносе тарафынан да бик ҙур рәхмәт тойғоһо менән ҡаршы алынды.

Финляндияла, Венгрияла һәм Румынияла эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең, хеҙмәткәрҙәрҙең массовый митингылары үткәрелә. Бөтә ерҙәрҙән Совет Хөкүмәте һәм И. В. Сталин адресына ысын йөрәктән ҡайнар рәхмәт һүҙҙәре килә.

Был өс илдең матбуғаты һәм политик деятелдәре СССР-ҙың дуҫтарса актының бик ҙур политик әһәмиәте булыуын билдәләйҙәр.

Был илдәрҙә демократик режимдар урынлаштырылған ваҡыттан алып, Советтәр Союзы уларға бик ҙур экономик һәм политик булышлыҡ күрһәтеп килә.

СССР үҙенең бәләкәй илдәр менән булған мөнәсәбәттәрендә тарафтарҙың тулы тиң хоҡуҡлылығы принцибынан сығып эш итә, бәләкәй илдәрҙең халыҡтарына ярҙам итергә кәрәклеген иҫәпкә ала һәм уларҙың бойондороҡһоҙлоғон һәм суверенитетен ҡыҫмай, ә киреһенсә, уларҙы ныҡыта. Советтәр Союзының был киң күңеллелек аҙымы — быҙың бик яҡшы миҫалы булып тора.

Советтәр Союзы үс алыу теләгенән сығып эш итмәй. Советтәр Союзы был илдәрҙең күптән түгелге үткәндәренән айырылғанлыҡтарын һәм был илдәр тарафынан киләсәктә агрессия булыу мөмкинлеген юҡҡа сығарған демократик үсеш юлына ныҡлы рәүештә аяҡ баҫҡанлыҡтарын иҫәпкә ала. Репарацион йөкләмәләрҙе кәметеү уларҙы демократиялаштырыуҙы тиҙләтә һәм тыныслыҡты ныҡытыу эшенә хеҙмәт итә. Шуға күрә Советтәр Союзы бәләкәй илдәрҙә демократияның үҫеү шарттарында уларҙың репарацион түләүҙәренә икенсе төрлө ҡарарға мөмкин, тип тапты.

Империалистик илдәрҙең мөнәсәбәттәре бөтөнләй икенсе төрлө ҡорола. «Маршалл планы» тәжрибәһе һәм башҡа күп кенә миҫалдар тәжрибәһе күрһәткәнсә, АҠШ капитализмдең бүреләрсә булған закондары нигеҙендә хәрәкәт итеп, күп кенә илдәрҙең һуғыштан һуңғы ҡыйынлыҡтарын ҙур монополиялар интересе өсөн файҙаланырға һәм был илдәрҙе экономик һәм политик үҙ алдарына йәшәү мөмкинлегенән мәхрүм итергә ынтыла.

Советтәр Союзының киң күңелле акты СССР-ҙың бәләкәй илдәр менән булған дуҫлығын һәм хеҙмәттәшлеген тағы ла күберәк ныҡытасаҡ. Был акт айырым государстволар араһындағы үҙ-ара мөнәсәбәттәр генә булып ҡалмай, бәлки тоғош демократияны, тыныслыҡты һәм халыҡ-ара хеҙмәттәшлекте ныҡытыу эшенә хеҙмәт итә. Бына шуның өсөн бөтә демократик илдәрҙең халыҡтары Совет Хөкүмәтенең аҡыллы һәм изге яҡшы ҡарарын хуплайҙар.

Немец халҡына ҡаршы, Европа халыҡтарына ҡаршы заговор

Июнь башында алты илдең — АҠШ-тың, Англияның, Голландияның, Бельгияның һәм Люксембургтың Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса Лондонда үткән кәңәшмәһе тамамланды. Кәңәшмә перерывтар менән өс айҙан артыҡ ваҡыт дауам итте. Ҡабул ителгән ҡарарҙарға киң массалар тарафынан ҡаршылыҡ буласағына был кәңәшмәлә ҡатнашыусыларҙың ҡурҡыуҙары нигеҙһеҙ түгел. Ҡарарҙарҙың иғлан ителгән өлөшө һүҙҙең Германияны бүлгеләүҙе артабан ойоштороу тураһында барғанлығын күрһәтә.

Һуңғы ике йыл буйы АҠШ, Англия менән һүҙ берләштереп, Германия тураһында Потсдам конференцияһы ҡарарын систематик рәүештә боҙоп килде, Германияны бүлгеләү, уның көнбайыш өлөшөн СССР-ға һәм Көнсығыш Европа илдәренә ҡаршы экономик һәм стратегик плацдармға әйләндереү юлын үткәреп килде.

1946 йылдың декабрендә Америка һәм Англия зоналарын бергә ҡушыу, «Бизония» төҙөү тураһында ҡарар ҡабул ителде. Көнбайыш зоналарҙа демократиялаштырыу һәм демилитаризациялау эше еҙелде, халыҡ хәрәкәтенең һәр төрлө күренеше баҫылдырылды. Бөтә экономик һәм политик тормош америкалылар контроле аҫтына күсте.

Ошо йылдың ғинуарында Франкфурттағы конференцияла Көнбайыш Германияның марионетик государствоһын төҙөүгә артабанғы аҙым яһалды. Ошо конференцияла Америка генералы Клей Көнбайыш Германияның ике палаталы ваҡытлы парламентен, верховный суд һәм «ерҙәрҙең берҙәм союзный банкыһын» төҙөүҙе иғлан итте.

Хәҙер Лондонда: Көнбайыш Германияның конституцияһын эшләү өсөн ошо йылдың беренсе сентябренә көнбайыш өс зонаның герман учредительный собраниеһын йыйырға, көнбайыш зоналарҙа сепаратный аҡса реформаһы үткәрергә, ошо йылдың 20 июненән үк яңы маркалар индерергә, Рурҙың төп продукцияһын бүлеү өҫтөнән контроль ҡуйырға, ҡарар ителгән.

Шулай итеп, Германияны тулыһынса бүлгеләү тамамлана, ә Рур производствоһы өҫтөнән Потсдам килешеүендә күҙҙә тотолған дүрт яҡлы контроль Рур продукцияһы өҫтөнән ялған «контроль» менән алмаштырыла. Бында етәкселек роле АҠШ вәкилдәренә бирелә, Рур производствоһында актив роль Германия магнаттарының үҙҙәренә бирелә.

Германиялағы американ империалистарының пландарына ҡаршы көрәшеүсе халыҡтарҙың, демократия лагереның көстәрен һәм мөмкинлектәрен Лондон кәңәшмәһендә ҡатнашыусылар тулыһынса иҫәпкә алмағандар. Һуңғы көндәрҙең фактылары шул турала һөйләйҙәр.

«Бидоның капитуляция яһауы бөтә Францияла халыҡтың асыуын тыуҙырҙы. Беҙ, был политика Мюнхен тип аталған дипломатик Седанға килтергән политика менән ике тамсы һыу кеүек бер-береһенә оҡшаған, тибеҙ», тип яҙа «Юманите» газетаһы.

Францияның коммунистар партияһы Франция халҡын хөкүмәттең Германия мәсьәләһендәге хыянатсыл политикаһына ҡаршы көрәшкә саҡыра. Һуғыш ветерандары ассоциацияһы (Арак) — 200 мең членды берләштергән был ассоциация «Францияның мөҡатләс хоҡуҡтарынан — улар өсөн меңләгән француз үҙенең ғүмерен ҡорбан иткән хоҡуҡтарҙан француз дипломаттарының баш тартыуҙарына ҡаршы» көрәшергә саҡыра.

Германияны бүлгеләүгә ҡаршы немец халҡы үҙе лә энергиялы рәүештә көрәшә. Германияның берҙәмлеге өсөн халыҡтан алынған һорауҙың мәғлүмәттәре лә шуны дәреслә.

Был мәсьәләлә немец халҡының позицияһы ныҡ булыуын Англияның Германиялағы хәбәрселәре лә билдәләйҙәр.

Бельгия, Люксембург, Голландия эшселәре Лондон кәңәшмәһе ҡарарҙарына ҡырҡа рәүештә ҡаршы сығыш яһайҙар.

Совет Хөкүмәте Лондондағы сепаратный кәңәшмәгә үҙенең ҡарашын ошо йылдың 6 мартында үк асыҡ һәм аныҡ рәүештә әйтеп бирҙе. Ул, был кәңәшмәнең ҡарарҙары — Потсдам килешеүен һәм халыҡ-ара башҡа ҡарарҙарҙы боҙоп, ҡабул ителгән был ҡарарҙарҙың закон көсөндә булыуы һәм халыҡ-ара авторитете булыуы мөмкин түгел, тип билдәләне.

Тағы ла „Маршалл планы“ тураһында

«Реконструкция планы» менән сығыш яһаған Маршаллдың Гарвардта һөйләгән телмәренән һуң бер йыл үткәс, АҠШ вәкилдәр палатаһы «Маршалл планы» һәм сит ил государстволарына башҡа төр «ярҙамдар» өсөн ассигнованиеларҙы 25 процент самаһына кәметеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Конгресс «ярҙам» программаһын хуплағандан һуң ике ай үткәс, ҡабул ителгән был ҡарар, күҙәтеүселәрҙең фекеренсә, «Маршалл планының» базаһы ныҡлы булмауын, «ярҙам» программаһының һөҙөмтәләренә ышаныс булмауын дәреслә. Ассигнованиеларҙы яҡлаусы һәм уға ҡаршы килеүселәр араһында булған ҡыҙыу сығыштар был фекерҙе дәреслә. Ассигнованиеларҙы кәметеүҙең ҡаршылашыусылары — Маршалл һәм сенатор Ванденберг тарафынан етәкселек ителеүсе һәм Ҡушма Штаттарҙың сит илдәргә артабан экспансияһы менән ҡыҙыҡһыныусы монополиялары ҡаршы кәүҙәләгән был кешеләр үҙҙәренең асыҡтан-асыҡ булған һүҙҙәрендә «Маршалл планы» АҠШ-та хәҙергә кризисты булдырмауға иҫәп тота тип таныйҙар. Ассигнованиелар буйынса комиссия члены Кэннен үҙенең сығышында, «ярҙам» буйынса был программа булмаһа, беҙ яңы депрессияла булыр инек, тип ныҡлап билдәләне.

«Ярҙамды» кәметеү яғында торусылар, айырым алғанда, ассигнованиелар комиссияһының председателе Табер, АҠШ «ярҙам» программаһына бик ҙур сумма тотонорға үҙенә юл ҡуя алмай, сөнки уның һөҙөмтәләре ниндәй буласағын бер кем дә алдан әйтә алмай, тип белдерәләр.

Вәкилдәр палатаһының ҡарары шуның менән бергә, Американың налог түләүсе ябай кешеләренең ҙур ҡаршылығына осраған «Маршалл планының» политик базаһының ныҡлы булмауы тураһында дәреслә. Сөнки «планлы» топ тураһында [illegible] Америка халҡы «ярҙам» программаһын АҠШ-тың ике партияһы политикаһының башҡа яҡтары менән — һуғыш интервенцияһы һәм Советтәр Союзына ҡаршы пропаганданы ҡабартыу менән, Америка эшселәренә ҡаршы сыҡҡан Тафт-Хартли закон проекты һәм Мундт законы менән бик ныҡ бәйле рәүештә күрә.

Вәкилдәр палатаһының ҡарары Көнбайыш Европала ла бик көслө тәьҫир тыуҙырҙы. Голландияның бер газетаһы был ҡарарҙы әлекке вәғәҙәләрҙән һуң «һалҡын душ» тип атаны.

Шуныһы характерлы, кәметеү тап промышленность оборудованиеһы өсөн булған ассигнованиеларға ҡағыла. [illegible] Был хәл Европа илдәренә «Маршалл планының» был государстволарҙың промышленносен аяҡҡа баҫтырыуҙы һис тә күҙ уңында тотмауын асыҡ күрһәтә.

Көнбайыш Европа илдәренең идара итеүсе түрәләренең Америка талаптарына ҡарата булған «оппозицияһын» артыҡ баһаларға ярамай, әлбиттә. Был илдәрҙең үҙҙәрен «Маршалл планы» шарттары менән бәйләгән етәкселәре милли экономика интерестарына зарар килтергән, АҠШ-тың Көнбайыш Европала киң протест хәрәкәте тыуҙырыуы мөмкин булған икән был талаптарына тыш ҡаршы килмәй. Был политиктар үҙҙәренең өмөттәрен Америка талаптарының кәметеләсәгенә һәм сенаттың «ярҙам» программаһын тулыһынса аяҡҡа баҫтырасағына бәйләйҙәр.

А. Шатилов.

Общиналар палатаһында

ЛОНДОН, 10 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Англияның сит ил эштәре министры Бевин, 9 июндә, Общиналар палатаһында һорауҙарға яуап биреү уңайлы, Англия «бер төркөм кешеләрҙе» Палестина хөкүмәте итеп танымай, тип белдерҙе.

Һеҙҙең, 1947 йылдың декабрендә Англия: Генеральный Ассамблеяның Палестина тураһындағы ҡарарын ҡабул итте; тип белдереүегеҙҙе иҫкә алғанда, ни өсөн һеҙ Израиль государствоһын таныуҙан баш тарттығыҙ? — тигән һорауға Бевин былай тип яуап бирҙе: «Генеральный Ассамблея тарафынан 29 ноябрҙә ҡабул ителгән рекомендация, 14 майҙа төҙөлгән Еврей государствоһын танырға мәжбүр итмәй, тип иҫәпләй Англия хөкүмәте».

Франция компартияһы политбюроһының ҡарары

ПАРИЖ, 10 июнь. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Франция компартияһының Политбюроһы алты державаның Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса Лондондағы килешеүенә ҡаршы тауыш биреү өсөн коммунистарҙың парламенттағы группаһын вәкил итеп ебәрә. «Лондон килешеүе, — тип әйтелә Политбюро ултырышынан һуң иғлан ителгән коммюникелә, — Францияның репарацияларға булған хоҡуҡын ҡорбан итә. Франция һуғыш һөҙөмтәһендә бушлыҡҡа әйләндерелде һәм емертелде. Был килешеүҙәр беҙҙең илебеҙҙе Рур продукцияһы өҫтөнән һәр төрлө контроль яһауҙан мәхрүм итә, беҙҙең именлегебеҙҙең гарантияһын юҡҡа сығара, бөтөрә. Килешеүҙәр Францияға ҡаршы алып барылған өс һуғыш ваҡытында Германияның арсеналы булған Рур бассейненең бик ҙур промышленносен һәм хәрби ҡеүәтен яңынан тыуҙыра. Килешеүҙәр Франкфуртта эшселәргә һәм демократик элементтарға ҡаршы көрәшеү һәм бөтә командалыҡ постарын нацистик промышленность магнаттарына биреү бурыстары менән реакцион һәм милитаристик Көнбайыш Германия хөкүмәтен төҙөй. Килешеүҙәр СССР-ға, яңы демократия илдәренә һәм Европаның бөтә илдәрендә демократик хәрәкәткә ҡаршы плацдармға әйләндерелгән Көнбайыш Германия өҫтөнән Америка империализмының тулы хакимлеген раҫлайҙар».

Бельгия коммунистар партияһы Политбюроһының ҡарары

БРЮССЕЛЬ, 9 июнь. (ТАСС). 9 июндә Бельгия коммунистар партияһы Политбюроһының ултырышы булды. Политбюро үҙенең ҡарарында Бельгия хөкүмәте тарафынан Лондон конференцияһында алынған позицияға ҡаршы протест белдерҙе. Ҡарарҙа былай тип әйтелә: хөкүмәт Көнбайыш Германияның беренсе нәүбәттә аяҡҡа баҫтырылыуына риза булып, Бельгияның интерестарына асыҡтан-асыҡ ҡаршы хәрәкәт итте. Ә Көнбайыш Германияның беренсе нәүбәттә аяҡҡа баҫтырылыуы Бельгияның именлеген һәм тыныслыҡты ҡурҡыныс аҫтына ҡуя. Политбюро Бельгияның киләсәге тураһында ҡайғыртыусы бөтә ирҙәрҙе һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы берләшергә һәм Лондон конференцияһы ҡарарҙарының парламент тарафынан раҫланмауы өсөн энергиялы эшмәкәрлек күрһәтергә саҡырҙы.

Палестиналағы хәлгә ҡарата

ПАРИЖ, 10 июнь. (ТАСС). Франс Пресс агентствоһының хәбәреһе Тель-Авивтан былай тип хәбәр итә: ғәрәптәр килешеү тураһындағы тәҡдимде ҡабул итергә үҙҙәренең риза булыуҙарын Бернадотҡа белдергәндән һуң, күп сәғәттәр үткәс, Ираҡ артиллерияһы үҙәк фронтта Кфар Сава янында Рамат Хаковеш, тигән еврей колонияһына төн буйы яңынан бик көслө рәүештә атты. Кеше ҡорбандары бар. Бөгөн иртәнсәк Тель-Авивта ике тапҡыр һауа тревогаһы иғлан ителде, ләкин бомбалар ташланманы.

ТЕЛЬ-АВИВ, 10 июнь. (ТАСС). «Израиль тауышы» радиоһы, Сирия ғәскәрҙәре Мисмай Халиарунг ауылына ҡаршы көслө атака йәйелдерҙеләр, тип тапшыра. Шул уҡ ваҡытта дошмандың башҡа ғәскәрҙәре Тивериад күленең көнсығыш ярында Израиль ғәскәрҙәре тарафынан алынған Самах ауылында бер төбәккә ата башланылар.

Халыҡ-ара Ҡыҙыл тәренең Тель-Авивтағы вәкиле Тель-Авивҡа һуңғы атака самолет тарафынан яһалды, был самолет бомбаларҙы, хәрби базаларға һис тә төбәп тормайынса, бик юғарынан ташланы, тип Женевалағы бюроға белдерҙе. Ҡыҙыл тәре был хәрәкәттәрҙе кешелеклек принциптәренең иҫ киткес һанға һуҡмау, тип иҫәпләй.



Өфө ҡалаһы, Маяковский исемендәге баҡсала.

Һүрәттә: Башҡортостан ауыл хужалығы институты, зоотехник факультетенең 2-се курс студенттәре (һулдан уңға) А. Власова, И. Кокотюха, В. Устюгов, Р. Вайтман үсемлектәр фәне буйынса экзаменға әҙерләнәләр. Г. Буравин фотоһы.

Уҡытыусыларҙың йәйге ялы

Быйыл, Башҡортостандың меңләгән уҡытыусылары үҙҙәренең отпускаларын төрлө санаторийҙарҙа һәм ял йорттарында үткәрәсәктәр. Шуның менән бергә республика буйынса 150 уҡытыусы Тыуған илдең баш ҡалаһы Мәскәүгә, герой ҡала — Ленинградҡа, Кавказ тауҙарында, Ҡырымда туристик походтар һәм экскурсиялар яһаясаҡтар.

Өфө ҡалаһының күп кенә уҡытыусылары Ишембай, Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Черниковск ҡалаларына, Чапаев дивизияһы эҙҙәренә сәйәхәттәр яһаясаҡтар.

Фельетон

Егупов һәм уның компанияһы

Кешеләр һөйләүҙән-һөйләүгә күсеп йөрөгән сәктәрҙә [illegible] Әбйәлил район промкомбинаты директоры Егупов менән осрашҡанда, иң элек, комбинаттың вывескаһы тураһында һорашырға кәрәк: вывеска бөтөнмө, сағылдырамы? Сөнки ул вывесканың һаҡланыуына иң ҙур әһәмиәт бирә. [illegible] Егуповтың бер терәге, йәшәү сығанағы! Әгәр вывеска булмаһа, шайтан белһен, комбинатты государство предприятиеһы тип һанамай ҙа башлаусылар бар. Ә унан һуң Егуповтың уйыны компанияһы нисек көн күрер?!.

Билдәле, «Райпромкомбинат» урынына—«Егупов һәм компанияһы» тигән вывеска алтын хәрефтәр менән яҙылып торһа, Егупов бик шат булыр ине. Замана ул түгел, ярамай. Ләкин Егупов [illegible]

Комбинат, ҡарап тороуға, тап комбинат кеүек: ерле промышленность цехтарын берләштерә. Мастерскойҙар бар. [illegible] Тик уның компанияһының күҙ буяу өсөн генә хеҙмәт итә.

«Цехтар» тип аталған нәмәләр, ысынбарлыҡта әйтелһә ҙә, уларҙа —быйма баҫыусы ла, итексе ла бәрәү генә. Бөтә комбинатты эшселәре ун кешенән артмай. Ә етәксе аппараттың штаты тулы: директор, уның урынбаҫары, өлкән бухгалтер, кассир, өсөр производство мөдирҙәре, өсөр склад мөдирҙәре, шофер, сторож, туган[illegible]

[illegible]

Р. Луговой

Яуаплы редактор урынбаҫары З. Ю. ВАХИТОВ

БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһы

Ленинград государство театраль институтының актерҙар факультетына (башҡорт бүлеге)

1948—1949 уҡыу йылына СТУДЕНТТӘР ҠАБУЛ ИТӘ

Факультет драма театрҙары актерҙары әҙерләй.

Институтҡа урта белеме булған, 17—25 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм 17—28 йәштәге ирҙәр ҡабул ителә.

Ҡабул ителеүселәр түбәндәге специальностарҙан: художестволы прозанан берәр әҫәр, йырҙан шиғыр (үҙенең теләге буйынса) уҡыуҙан һынау үтәләр. Бер үк ваҡытта музыкаль һәм бейеүгә һәләттәре тикшерелә.

Специальность буйынса актерҙар факультетына ҡабул ителергә яраҡлы тип табылған кешеләр рус теленән һәм әҙәбиәтенән (телдән һәм яҙма), СССР халыҡтары тарихынан һынау тапшыралар.

Студенттар стипендия һәм дөйөм торлаҡ менән тәьмин ителәләр.

Гаризалар ҡабул итеү 1948 йылдың 10 августына тиклем.

Инеү тураһындағы гаризалар һәм документтар түбәндәге адреска ебәрелергә: Өфө ҡалаһы, Ленин урамы, 5—а номерле йорт. БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһы.

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—[illegible] промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00177. Өлкә газета-журналдар типографияһы Тираж [illegible]

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Кыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Совете органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 119
16
июнь
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы. 15 июндәге көндөҙгө ултырыш. (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Советтәренең ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы Председателе депутат Н. Р. Уразбаев доклады. (1—2-се биттәр).

БАССР Министрҙәр Советендә һәм ВКП(б) Өлкә Комитетендә. 1948 йылдың май айына промышленность предприятиеләрендә социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында. (1-се бит).

Сәсеүлектәрҙә әлгәлә тәрбиәләү—юғары урожай алыуҙа мөһим шарт. (3-сө бит).

Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөлешендә. (3-сө бит).

Н. Наймушин. — Нига йыйылышта мастерҙәр һөйләмәне? (3-сө бит).

ФЕЛЬЕТОН УРЫНЫНДА. Рахман Кәли. — Боҙолған кәйеф. (4-се бит).

Ситилдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Урындағы Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен ҡырҡа яҡшыртырға

БАССР Верховный Советенең икенсе сессияһы кисә үҙенең ултырышында Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен яҡшыртыу тураһындағы мәсьәләне тикшерҙе. Һуғыштан һуңғы яңы биш йыллыҡ беҙҙең илебеҙ алдына хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөн артабан үҫтереүҙә бик ҙур бурыстар ҡуйҙы. Был бурыстарҙы уңышлы хәл итеү урындағы Советтәрҙең бөтә етәкселек эшмәкәрлегең юғары кимәлгә күтәреүҙе талап итә.

Хәҙер, Тыуған илебеҙ бөтә юлдар менән коммунизмдең еңеүенә табан барған бер ваҡытта Совет органдары үҙҙәренең ойоштороусан көстәрен тағы ла ныҡыраҡ күрһәтергә, инициативалыраҡ булырға, хужалыҡ һәм культура пландарын үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе, резервтәрҙе хәрәкәткә килтерергә тейештәр. Улар һәр бер ауылда, районда, ҡалала хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө пландарының уңышлы үтәлеүе өсөн тураҡан-тура яуаплылыҡтарын көсәйтергә тейештәр.

Күптән түгел булып үткән һайлауҙарҙан һуң Башҡорт АССР-ы Советтәренең эштәре байтаҡ яҡшырҙы. Был беҙҙең республикабыҙҙың хужалыҡ уңыштарында айырыуса асыҡ сағыла. 1947 йылда государство промышленносе буйынса валовой продукция етештереү 104 процент, ә 1940 йыл менән сағыштырғанда район промышленносе буйынса 169 процент, кооператив промышленносе буйынса 134 процент тәшкил итте. Ауыл хужалығы өлкәһендә лә беҙҙең уңыштарыбыҙ күренекле булды.

Ләкин беҙҙең алда тағы ла ҙурыраҡ һәм яуаплыраҡ бурыстар тора. Беҙгә промышленносебеҙҙең барлыҡ тармаҡтары буйынса ла пландарҙы үтәргә һәм арттырып үтәргә кәрәк. Беҙгә быйыл уҡ бөртөклө ашлыҡ культураларының һәр гектарынан 11,5—12 центнер урожай алырға кәрәк. Беҙгә уҙған йылға ҡарағанда мал һанын 30 процентҡа арттырырға өлгәшергә кәрәк. Беҙҙең алда культура төҙөлөшө өлкәһендә лә бик ҙур бурыстар тора.

Был бурыстарҙы беҙ тик урындағы Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрен бөгөндән уҡ ҡырҡа яҡшыртҡанда ғына уңышлы хәл итә алырбыҙ. Хеҙмәтсәндәр депутаттары Советтәренең бөтә эшмәкәрлеге башлыса ойоштороу-массовый эшкә нигеҙләнергә тейеш.

Партиябыҙҙың XVIII съезында Михаил Иванович Калинин былай тине: Советтәрҙең ойоштороу-массовый эше «Конкрет административ һәм политик сараларҙа, хужалыҡ һәм культура эшмәкәрлегендә күренә. Совет органдары тарафынан тормошҡа үткәреләторған бөтә сараларҙы халыҡҡа аңлатыу, массаларҙы был сараларҙы тормошҡа ашырыу эшенә ылыҡтырыу — бына шулар Советтәрҙең массовый эше булып торалар инде. Советтәр бына ошо массовый эш ярҙамында массаларҙы туплайҙар һәм ойошторалар».

Ләкин күп урындарҙа был билдәле талапты онотталар. Советтәрҙең эштәрен Конституция һәм киң демократизмде эҙмә-эҙ үткәреү нигеҙендә ҡормайҙар. Советтәрҙең ойоштороу эштәренең төп формаларының береһе сессиялар үткәреү иҫәпләнә. Шуға ҡарамаҫтан, урындағы күп кенә Советтәр уны регуляр саҡырыуға иғтибар итмәйҙәр. Мәҫәлән, Матрай, Ауырғазы, Йәрмәкәй һәм Хәйбулла райондарында 1947 йылда 1—2 тапҡыр ғына сессия үткәргәндәр. Ә был райондарҙың ҡайһы бер ауыл Советтәрендә сессиялар бөтөнләй ҙә саҡырылмағандар. Совет демократияһын бындай боҙоуға артабан һис тә юл ҡуйырға ярамай.

Күп һандағы депутаттарҙы һәм хеҙмәтсәндәрҙе Совет эшенә актив ылыҡтырыуҙа, уларҙы государство менән идара итеүгә ҡатнаштырыуҙа даими комиссияларҙың роле ҙур. Ләкин күп райондарҙың Советтәре был төрҙәге ойоштороу-массовый эшкә аҙ иғтибар итәләр. Бына Әбйәлил, Абзан һәм ҡайһы бер башҡа райондарҙа даими комиссиялар бөтөнләй эшләмәйҙәр. Урындағы Советтәрҙең эшенең уңышы депутаттарҙың активлегенә бәйләнгән. Бурыс — һәр бер депутатты һәм уның аша киң хеҙмәтсәндәр массаһын актив совет эшенә ылыҡтырыуҙа тора.

Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәре һайлаусыларҙың тәкдимдәрен һәм наказдарын теүәл үтәүгә йүнәлдерелгән булырға тейеш. Шуның өсөн һайлаусылар наказдарының үтәлешен, партия, хөкүмәт һәм үҙе сығарған ҡарарҙың үтәлешен систематик күҙәтә барыу Советтәрҙең иң мөһим бурыстарының береһе булып тора.

Ойоштороу эшендә иң мөһиме, — ти иптәш Сталин, — ул кешеләрҙе һайлап алыу һәм үтәлеште тикшереү. Кадрҙар менән өҙлөкһөҙ эшләргә, уларға даими ярҙам итергә, өйрәтергә — бына Советтәрҙән ни нәмә талап ителә.

Советтәрҙең бөтә ойоштороу-массовый эше массалар араһында социалистик ярышты киң ойоштороу, халыҡ йыйылыштарын йышыраҡ һәм ойошҡаныраҡ үткәреү, тәнҡит һәм үҙ-үҙенде тәнҡитте йәйелдереү аша үткәрелергә тейеш.

Хәҙер республика биш йыллыҡ пландың өсөнсө хәл иткес йылының иң яуаплы осорона инде. Яҡын айҙарҙа промышленноста йыллыҡ планды үтәүҙе хәл итергә, яңы урожайҙы йыйнап алыуға әҙерлекте яҡын көндәрҙә тәьмин итергә кәрәк. Урындағы Советтәрҙең бөтә ойоштороу-массовый эше бына шуға йүнәлтелгән булырға тейеш.

Башҡортостан Советтәре — государство власе органдары коммунистар партияһының көндәлек етәкселеге аҫтында үҙҙәренең өҫтәренә төшкән бурыстарҙы бөтә эш өлкәһендә лә намыҫ менән үтәп сығырҙар.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕНЕҢ ИКЕНСЕ СЕССИЯҺЫ

15 июндәге көндөҙгө ултырыш

Кисә, көндөҙгө сәғәт 12-лә, Башҡорт АССР-ы Министрҙәре Советенең ултырыштар залында Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы асылды.

Председатель өҫтәле артында — Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Председателе депутат **И. Ғ. Ҡадиров** һәм уның урынбаҫарҙары депутаттар **Д. В. Соков** һәм **Ф. Н. Баянова.**

Хөкүмәт ложаларында Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы члендәре, министрҙәр урынлашҡандар.

Председателлек итеүсе депутат И. Ғ. Ҡадиров Мандат комиссияһы председателе депутат **В. И. Улинға** доклад яһау өсөн һүҙ бирә.

Депутат Улин түбәндәгеләрҙе белдерә: Башҡорт АССР-ы Конституцияһына һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советына һайлауҙар тураһындағы Положениеһенең 100-сө статьяһына ярашлы рәүештә 1947 йылдың 21 декабрендә Башҡорт АССР-ының Ҡыйғы районында 148-се номерле Ҡыйғы һайлау округы буйынса һәм Саҡмағош районында 103-сө номерле Ҡалмаш һайлау округы буйынса депутатлыҡтан сыҡҡан ике кеше урынына Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутаттар һайлау үткәрелгәйне. Был округтар буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Советына һайлауҙарҙа 17.214 һайлаусы ҡатнашты, йәки был, ошо округтарҙағы һайлаусыларҙың дөйөм һанының 99,99 процентен тәшкил итә. Коммунистар менән партияһыҙҙар блогы кандидаттары өсөн 17.204 һайлаусы тауыш бирҙе, был, тауыш биреүҙә ҡатнашыусы һайлаусыларҙың 99,99 процентен тәшкил итә.

Мандат комиссияһы Башҡорт АССР-ы Верховный Советына депутаттар һайлауҙарҙы үткәреү Конституция һәм Башҡорт АССР-ы Верховный Советына һайлауҙар тураһындағы Положение нигеҙендә, уларға тулы ярашлы рәүештә, дөрөҫ үткәрелде, тип билдәләй.

Һәр ике округта ла Башҡорт АССР-ы Верховный Совете депутаттары итеп коммунистар менән партияһыҙҙар блогы кандидаттары: 148-се номерле Ҡыйғы һайлау округы буйынса — П. И. Каменев, 103-сө номерле Ҡалмаш һайлау округы буйынса — А. К. Ермолаев һайландылар.

Депутат **М. Н. Сәхәүетдинованың** тәкдиме буйынса Башҡорт АССР-ы Верховный Совете П. И. Каменевтең һәм А. К. Ермолаевтың депутатлыҡ полномочиеләре дөрөҫ, — тип таныуы тураһында Мандат комиссияһының докладын бер тауыштан раҫлай.

Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Сессия эштәренең түбәндәге көн тәртибен раҫлай:

1. Башҡорт АССР-ы Советтәренең ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында.

2. Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджетен, Башҡорт АССР-ының 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында отчетты раҫлау.

Был мәсьәләләр Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы тарафынан индерелә.

3. Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) текстына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында.

Был мәсьәлә Башҡорт АССР-ы Верховный Совете тарафынан һайланған Редакцион Комиссия тарафынан индерелә.

4. Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең Указдарын раҫлау.

5. Башҡорт АССР-ының Верховный Суды члендәрен һәм Башҡорт АССР-ы территорияһында эшләүсе махсус судтарҙың халыҡ заседателдәрен һайлау тураһында.

Был мәсьәләләр Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы тарафынан индереләләр.

Көн тәртибенең беренсе пункты буйынса Советтәрҙең ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында доклад яһау өсөн һүҙ Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы Председателе депутат **Н. Р. Уразбаевҡа** бирелә.

Башҡорт АССР-ы Советтәренең ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы Председателе депутат Н. Р. Уразбаев доклады)*

Депутат иптәшләр!

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәренә булып үткән һайлауҙар Совет Социалистик Республикалар Союзы халыҡтарының мораль-политик берҙәмлеген асыҡ күрһәтте. Һайлауҙарҙың йомғаҡтары илебеҙ халыҡтарының үҙҙәренең Совет власенә, Ленин—Сталин партияһына сикһеҙ бирелгәнлектәрен, беҙҙең социалистик государствобыҙҙың нигеҙе булған Советтәрҙе нығытырға тырышыуҙарын күрһәтте.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре үҙҙәренең бөтә эше менән беҙҙең халҡыбыҙҙың мораль-политик берҙәмлеген нығыталар, төрлө милләт хеҙмәтсәндәренең дуҫлығын, хеҙмәттәшлеген нығытыуға һәм уларҙы берҙәм государство союзына берләштереүгә ярҙам итәләр. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре беҙҙең илебеҙҙең бөтә халҡын — эшселәрен, крәҫтиәндәрен һәм интеллигенцияһын — большевиктар партияһы тирәһенә берләштереүсе һәм ойоштороусы ҡеүәтле көс булып торалар.

Партия Советтәргә уларҙың эшендә етәксе күрһәтмәләр, политик линия бирә. Партия Советтәрҙе һәм уларҙың органдарын теүәл эшләргә һәм халыҡ массаларынан айырылмаҫҡа өйрәтә.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре үҙҙәренең бөтә хужалыҡ-ойоштороу һәм культура тәрбиә эшен, был эшкә киң ҡатлам халыҡ массаһын ылыҡтырыу юлы менән алып баралар, бөтә сараларҙы үткәреүҙә халыҡтың ярҙамына таяналар, халыҡ интересторе өсөн һәм халыҡ контроле аҫтында эшләйҙәр.

«... Советтәр, — тип күрһәтте иптәш Сталин, — тураҡан-тура массаларҙың үҙ ойошмалары, йәғни иң демократик һәм тимәк, массаларҙың иң авторитетле ойошмалары булып торалар; улар массаларға яңы государство ҡороуҙа һәм уға идара итеүҙә ҡатнашыуҙы максималь рәүештә еңеләйтәләр һәм массаларҙың революцион энергияһын, инициативаһын, ижади һәләтлектәрен максималь рәүештә үҫтерәләр...» (Әҫәрҙәр, VI том, 119-сы бит)

Бөйөк Ватан һуғышы, совет общественный ҡоролошоноң, башҡа теләһә ниндәй общественный ҡоролошҡа ҡарағанда ла, иң һәләтле һәм иң ныҡлы булыуын, совет общественный ҡоролошоноң —обществены ойоштороуҙа иң яҡшы форма булыуын, бөтә һынауҙарға ҡаршы тора алырлыҡ күп милләтле, иң ныҡлы государство булыуын, уның ныҡлығына донъяның теләһә ниндәй өлөшендәге теләһә ниндәй милли государствоның да күҙе ҡыҙырлыҡ государство булыуын күрһәтте.

Бөйөк Ватан һуғышының еңеүле рәүештә бөтөүенән һуң государствобыҙ алдына яңы бурыстар килеп баҫты. Уларҙы уңышлы хәл итеү өсөн урындарҙағы Советтәрҙең бөтә етәксе эшенең кимәлен күтәреү талап ителә.

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың еңеүе өсөн, Тыуған илебеҙҙе артабан сәскә аттырыу өсөн бөтә халыҡ көрәше шарттарында Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре байтаҡ эштәр эшләнеләр. Шуны ғына күрһәтеү ҙә етә — 1947 йылда государство промышленносе буйынса валовой продукция етештереү 104 процент тәшкил итте. Ә 1940 йыл менән сағыштырғанда район промышленносе буйынса 169 процентҡа, кооператив промышленносе буйынса 134 процентҡа етте.

Республикабыҙҙың социалистик баҫыу эшсәндәре, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумының тарихи ҡарарҙарын үтәп һәм Союз Хөкүмәтенең, партия Үҙәк Комитетенең һәм иптәш Сталиндең сәсеү орлоғо, аҙыҡ-түлек, тракторҙар һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары менән бик ҙур ярҙамы арҡаһында 1947 йылда ауыл хужалығын күтәреү һәм артабан үҫтереүҙә серьез уңыштарға өлгәштеләр. Колхоздар һәм совхоздар 1947 йылда, 1946 йыл менән сағыштырғанда, яҡшы урожай алдылар. Ужым культуралары сәсеү майҙаны, 1946 йыл менән сағыштырғанда, 70 мең гектарға артты.

Республикабыҙҙың машина-трактор станциялары 1947 йылда, бер нисә йыл эсендә беренсе тапҡыр трактор эштәре планын арттырып үтәнеләр.

1947 йылда юғары урожай алған өсөн Союз Хөкүмәте тарафынан ауыл хужалығы алдынғыла-

(Аҙағы 2-се биттә).

*) Доклад ҡыҫҡартылып бирелә.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы.

Һүрәттә: Ултырыштар залы. Беренсе планда—Советтәр Союзы Геройы Ш. Ямалетдинов һәм Социалистик Хеҙмәт Геройы Б. Батырова иптәштәр.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

БАССР Министрҙәр Советендә һәм ВКП(б)

Өлкә Комитетендә

1948 йылдың май айына промышленность предприятиеләрендә социалистик ярыш йомғаҡтары тураһында

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитете бюроһы республикабыҙҙың промышленность предприятиеләрендә 1948 йылдың май айында социалистик ярыш йөкләмәләренең үтәлеүен тикшереп үтте.

1948 йылдың май айы производство планын арттырып үтәүсе Черниковск машиналар төҙөү заводы (директоры иптәш Ферин, Үҙәк Комитет парторгы иптәш Толмачев, завком председателе иптәш Попков) социалистик ярышта еңеүсе тип танылды һәм унда БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы ҡалдырылды.

БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитете 1948 йылдың май айында Белорет металлургия комбинатының, агрегат, металлошланг, кабель заводтарының, Өфө нефть эшкәртеү заводының, химия заводының, Түбән-Троицк сукно фабрикаһының, Черниковск фанера комбинатының, 1 Май исемендәге шырпы фабрикаһының яҡшы эшләүҙәрен билдәләп үттеләр.

Беренсе тираждар

26 июндә Мәскәүҙә СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса Икенсе государство заемының беренсе тиражы була.

524.719.200 һумлыҡ 1.966.500 отош уйналасаҡ.

Ниндәй ҙә булһа сәбәптәр арҡаһында заемға яҙылған урындарында үҙҙәре түләгән облигацияларын алмаған кешеләр үҙҙәре эшләгән предприятие, ойошма йәки колхоз инган райондағы һаҡлыҡ кассаларынан уларҙы ала алалар.

(ТАСС).

Башкорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы

Башкорт АССР-ы Советтәрененң ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны якшыртыу саралары тураһында

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советы Председателе депутат Н. Р. Уразбаев доклады

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

ғынан 12 кешегә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде, 849 кеше ордендәр һәм медалдәр менән наградланды.

Колхозсылар, МТС, совхоз работниктәре һәм ауыл хужалығы специалистәре, иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе үтәп, байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Ошо йылдың 10 июненә, үткән йылға ҡарағанда, 390 мең гектар артығыраҡ сәселгән, шул иҫәптән, бойҙай 339 мең гектар артығыраҡ сәселгән, был 1947 йылда бойҙай культураһының фактик сәсеүҙәгенә сағыштырғанда, 197,2 процент тәшкил итә.

Республиканың совхоздары беренсе июнгә яҙғы сәсеү планын тамамланылар, үткән йылға ҡарағанда, 38.907 гектар артығыраҡ сәстеләр.

Туймазы, Дыуан, Краснокам, Матрай, Яңауыл, Ҡандра, Баймаҡ, Белорет, Балтач, Салауат райондары һәм башҡа ҡайһы бер райондар сәсеү планын үтәү эшен яҡшы башҡарып сыға алдылар. Шулай булһа ла республика буйынса тотош алғанда, 10 июнгә сәсеү планы 97,2 процентҡа үтәлде. Йомағужа, Илеш, Нурмәкәй, Архангель, Көйөргәҙе, Мәләүез, Зианчура, Күгәрсен райондары айырыуса насар эшләнеләр. Улар сәсеү планын 84—90 процентҡа ғына үтәнеләр.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарға юл ҡуймау һәм уны үтәү өҫтөнән нығыт контроль булдырыу тураһындағы ҡарарын беҙ әле һаман да тулыһынса үтәп еткерә алмайбыҙ. Колхоздарға етәкселек итеүҙә Советтәрҙең эше ауыл хужалығы артеле Уставын нығыт үтәүгә йүнәлдерелергә тейеш. Беҙҙә общественный малсылыкты үҫтереү эшендә лә ҙур етешһеҙлектәр бар әле. 1947 йылда малсылыкты үҫтереү буйынса государство планы, республика күләмендә алғанда, үтәлеп еткерелмәне. 1948 йылдың беренсе июненә план 85 процентҡа ғына үтәлгән һәм ниә малдар буйынса план бигерәк тә насар үтәлә.

Колхоздарҙа аттарҙы һаҡлау һәм яҡшыртыу эшенә тейешенсә иғтибар бирелмәй һәм хәстәрлек күрелмәй.

Малдарҙың продукт биреүе сиктән тыш түбән кимәлдә ҡалып килеүҙә дауам итә. 1947 йылда һәр бер һауым һыйырҙан, план буйынса билдәләнгән 1000 литр урынына, 896 литр ғына һөт һауып алынды.

Партияның XXI өлкә конференцияһы күрһәтеп үткәнсә, ауыл хужалығына етәкселек итеүҙә беҙҙә ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарҙарында күрһәтелгән ҙур етешһеҙлектәр бар, уларҙы бөтөрөү бик әкрен бара әле.

Ауыл хужалығына етәкселек итеүҙә булған был ҙур етешһеҙлектәр беҙҙең республика Советтәренең ауыл хужалығын күтәреү өсөн, юғары урожай алыу, общественный малдар һаны һәм уларҙың продукты биреүен арттырыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙән файҙаланмағанлыктарын, бөтә ресурстарҙы тупламағанлыктарын күрһәтәләр.

Быйыл беҙ ауыл хужалығын күтәреү эшендә хәл иткес һөҙөмтәләргә өлгәшергә тейешбеҙ, былың өсөн беренсе нәүбәттә бөтә ауыл хужалығы эштәрен уңышлы тамамларға кәрәк. Быйыл колхоздарҙа бөтә ауыл хужалығы культураларының урожайын йыйнау майҙандары, үткән йылға ҡарағанда, 496 мең гектарға арта. Беҙ быйыл гектарынан уртаса 10,5 — 12 центнер иген алырға тейешбеҙ.

1948 йылда колхоздарҙа бөтә тәр общественный малдар һаны, үткән йылға ҡарағанда, 30 процентҡа артырға тейеш.

Алда ҡыйын һәм яуаплы эш тора. Сәсеүлектәрҙе ентекләп тәрбияләргә, ҡый үләндәренән таҙартырға һәм пар һөрөргә кәрәк.

Бөтә совет һәм ер органдарының төп бурысы — быйыл мул урожай алыуҙан, иген әҙерләү планын тулыһынса үтәүҙән, бөтә ауыл хужалығы эштәрен билдәләнгән сроктарҙа башҡарыуҙан, малсылыкты үҫтереү планын үтәүҙән һәм, шулай итеп, республика ауыл хужалығының бөтә тармаҡтарын артабан күтәреү өсөн нығыт нигеҙ булдырыуҙан тора.

Был почетлы бурысты үтәү өсөн республикабыҙҙың Советтәре иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәрлек итеп, колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктәре араһында социалистик ярышты ойоштороға тейештәр. Бөтә Советтәр Союзының хеҙмәтсәндәре кеүек үк, беҙҙең республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре лә һуғыштан һуңғы ике йыл эсендә промышленность өлкәһендә лә ҙур уңыштарға өлгәштеләр. Унарлаған предприятиелар 1947 йылғы планды срогынан элек — бөйөк Октябрь Социалистик революцияһының 30 йыллығына тамамланылар.

Ләкин Башҡортостан Министрҙәр Советы ҡарамағындағы предприятиелар биш йыллыктың беренсе ике йылы планын 96 процентҡа ғына үтәнеләр. Әйберҙәрҙе билдәләнгән номенклатурала эшләп сығарыу буйынса план үтәлмәне. Беҙҙә әле урындағы промышленностең һәм кооператив промышленносеның насар сифатлы продукция сығарыуы һаман дауам итеп килә.

Район Советтәренең башҡарма комитеттәре район промышленносе предприятиеларының эшен тәртипкә һалырға, бөтә предприятиеларҙың эшен нығыт контроль аҫтына алырға һәм урындағы сырьенан күп һанда һәм яҡшы сифатлы киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарыуҙы арттырыуға бөтә саралар менән өлгәшергә һәм уны халыҡҡа хеҙмәт итеүгә йүнәлдерергә тейештәр.

Партия һәм Хөкүмәт хеҙмәтсәндәрҙең культура-тормош шарттарына бик ҙур иғтибар бирәләр. Был сталинсе яңы биш йыллыктың иң мөһим бурыстарынан береһе булып тора.

Хөкүмәт ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа төҙөлөш эштәре үткәреүгә һәм уларҙы төҙекләндереүгә йыл һайын күп средстволар бирә. Ләкин республикабыҙҙың ҡалаларында был средстволарҙы үҙләштереү һис тә ҡәнәғәтләнерлек түгел. Республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында һәм ҡалаларында Советтәрҙең башҡарма комитеттәре инициатива күрһәтмәйҙәр һәм төҙекләндереү мәсьәләләре менән сиктән тыш насар шөғөлләнәләр. Мәҫәлән, Ғафури районы үҙәге Красноусол поселкаһында район һәм поселка Советтәренең башҡарма комитеттәре поселканы төҙекләндереү менән бөтөнләй шөғөлләнмәйҙәр — күперҙәр төҙәлмәй, урамдар тәртипһеҙ хәлдә тора. Октябрьск ҡалаһы һәм Дим поселкаһы ғәҙәттән тыш тәртипһеҙ хәлдә.

Советтәр төҙекләндереү эшенә ҡалаларҙың һәм ауылдарҙың бөтә кешеләрен мобилизовать итергә, хеҙмәтсәндәрҙең инициативаһына етәкселек итергә тейештәр. Был йәһәттән Черниковск ҡала Советы яҡшы өлгө була ала. Ул һайлауҙарҙан һуң үткәрелгән нәүбәттәге сессияһында ҡала халкын культура һәм көн-күреш яғынан хеҙмәтләндереү буйынса ҙур ҡарар ҡабул итте. Был ҡала Советы үҙенең депутаттары һәм активе аша хеҙмәтсәндәрҙе сессия ҡарарҙарын үтәүгә тупланы һәм сērьез һөҙөмтәләргә өлгәште. Ҡалала туберкулезниктәр өсөн больница асылды; Черниковск—Өфө маршруты менән йөрөүсе автобустар һаны артты; өҫтәмә рәүештә 32 сауҙа предприятиеһе, шул иҫәптән бер универмаг асылды; Старо-Северный поселкаһында эшселәрҙең балалары өсөн башҡорт, татар мәктәбе асылды; яңы ҡалала водопровод һалыу эше тамамланды; ҡалала кинотеатр һалынып бөттө.

Нуриман районы «Красный ключ» поселкаһында поселка Советы исполкомы (председателе иптәш Мөхәмәтов) бөтә халыкты поселканы төҙекләндереү эшенә ойошторҙо. Өс мең төптән артыҡ ағас ултыртылды. Урамдарға ағас тротуарҙар түшәлә, юлдар төҙәтелә, ҡойолар таҙартылды һәм ремонтланды, поселка таҙартылды.

Республикабыҙҙың башҡа райондарында ла шундай уҡ саралар күрелә.

Республикала халыҡтың һаулығын һаҡлау өлкәһендә лә сērьез эш үткәрелде. 1947 йылда дауалау учреждениеларының сәлтәре 423 койкаға арттырылды. Октябрьск һәм Ишембай ҡалаларында поликлиниктәр асылды, Белорет, Стәрлетамаҡ, Бәрә, Бәләбәй ҡалаларында махсус 4 медицина пункты асылды.

Республикабыҙҙың күп кенә Советтәре хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау мәсьәләләре менән даими рәүештә шөғөлләнеп киләләр, һаулыҡ һаҡлау бүлектәре һәм Советтәрҙең даими комиссиялары аша ҙур эш алып баралар. Ләкин, үкенескә ҡаршы, шундай райондар за бар: уларҙың етәкселәре хеҙмәтсәндәрҙең һаулығын һаҡлау эшен икенсе дәрәжәләге эш тип ҡарайҙар һәм общественный урындарҙың, халыҡ йәшәй торған пункттарҙың санитария яғынан насар хәлда тороуына иғтибар итмәйҙәр. Советтәр дауалау учреждениеларын даими иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алырға, больницаларҙың хужалығын нығытырға һәм халыҡҡа медицина хеҙмәте күрһәтеүҙе нығыт яҡшыртырға тейештәр.

Культура-төҙөлөш өлкәһендә Совет органдарының беренсе нәүбәттәге бурысы, бөтәһенән элек, халыҡ мәғарифе эшен артабан яҡшыртыуҙан торорға тейеш.

Беҙҙең республикала быйылғы уҡыу йылында өҫтәмә рәүештә 50 башланғыс мәктәп асылды. 1947—1948 уҡыу йылында балаларҙы уҡыуға ылыҡтырыу планға ҡарата 97,6 процент булды. 1948 йылдың беренсе апреленә уҡыуға ылыҡтырылмаған балалар 1870 ине. Уҡыу йылы эсендә 3075 кеше уҡыусы ташланы. Дөйөм уҡытыу планы бигерәк тә Матрай, Белорет райондарында һәм ҡайһы бер башҡа райондарҙа насар үтәлә. Үткән йыл менән сағыштырғанда, уҡытыу эшенең сифаты бер ни тиклем яҡшырһа ла, күп мәктәптәрҙә уҡытыу эшенең торошо әле һаман да ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Алдағы уҡыу йылында хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре мәктәптәрҙең эштәрен киҫкен рәүештә яҡшыртырға, мәктәп йәшендәге бөтә балаларҙы мәктәпкә ылыҡтырырға һәм уҡыусыларҙың уҡыуҙы ташлауҙарына юл ҡуймаҫҡа тейештәр. Совет органдары мәктәптәрҙе уҡыу йылына алдан әҙерләү өсөн бөтә сараларҙы күрергә тейештәр. Уҡытыусыларҙы иғтибар һәм хәстәрлек менән солғап алырға, уҡытыу-тәрбиә эше менән шөғөлләнергә, уҡытыусыларға уҡыусыларҙың өлгәрешен күтәреүҙә, уҡытыу-тәрбиә эшен яҡшыртыуҙа ярҙам итергә кәрәк.

Халыҡ араһында культура-тәрбиә эштәренең торошо өсөн Советтәр өҫтөнә ҙур яуаплылыҡ йөкмәтелә; һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ пландан килеп сыға торған бурыстарҙы үтәүгә массаларҙы мобилизовать итеү эшендә беҙҙең уңыштарыбыҙ күбеһенсә шуға бәйләнгән.

Беҙҙә культура-ағартыу учреждениеларының киң сәлтәре бар. Ләкин булған культура-ағартыу учреждениелары тулыһынса файҙаланылып еткерелмәйҙәр. Уларҙың байтаҡ өлөшө эшләмәй йәки сиктән тыш насар эшләй. Мәҫәлән, Бәләбәй, Ауырғазы, Байҡыбаш, Әлшәй, Көйөргәҙе, Күгәрсен һәм ҡайһы бер башҡа райондарҙың культура-ағартыу учреждениелары айырыуса насар эшләйҙәр.

Халыҡ йәшәй торған һәр бер пунктта, колхозда культура үҙәктәре булдырыу өсөн хеҙмәтсәндәрҙең массовый походын ойошторорға кәрәк; унда хеҙмәтсәндәр теләгән һындай һорауҙарына ла яуап ала алһындар, китап, газета уҡый алһындар, лекциялар, доклададтар тыңлаһындар, кино ҡарай, художестволы үҙ эшмәкәрлек концерттәре тыңлай алһындар.

Республикабыҙҙа Советтәр һәм социаль тәъминәт органдары тарафынан байтаҡ эш эшләнде. 1948 йылдың беренсе кварталында ғына Ватан һуғышы инвалидтәренә 15 миллион 590 мең һум, хеҙмәт инвалидтәренә 11 миллион 255 мең һум, һуғышта һәләк булған воиндарҙың семьяларына 37 миллион 682 мең һум пенсия бирелде һәм башҡа ярҙамдар күрһәтелде.

Ләкин айырым райондарҙа һуғыш инвалидтәрен, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларын материаль-көнкүреш яғынан хеҙмәтләндереү эшендә ҙур ғына етешһеҙлектәр бар әле.

Күп кенә райондарҙа социаль тәъминәт органдарының работниктәре хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьялары менән бәйләнеш тотмайҙар, канцелярияла ултырып ваҡыт үткәрәләр һәм хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларын материаль-тормош яғынан хеҙмәтләндереү эшенең ысын торошон белмәйҙәр.

Совет органдары Ватан һаҡсыларының семьялары тураһында даими хәстәрлек күрергә тейештәр. Хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларына, Ватан һуғышы инвалидтәренә пособиеларҙың үҙ ваҡытында бирелеп барыуына даими контроль тәъмин итергә, уларға закон тарафынан ҡуйылған льготаларҙы тулыһынса бирергә тейештәр. Шулай уҡ бөтә инвалидтәрҙе, хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең семьяларын эшкә урынлаштырыуҙы тәъмин итергә һәм уларҙың жалобаларын, ғариҙаларын ҡарау-тикшереү эшен яҡшыртырға кәрәк. Республикалағы бөтә балалар йорттарында тейешле тәртип урынлаштырырға, балаларҙы, бигерәк тә һуғышта һәләк булған воиндарҙың балаларын, балалар йорттарына урынлаштырыу эшен яҡшыртырға кәрәк.

Депутат иптәштәр!

Беҙҙең илебеҙ хәҙер халыҡ хужалығын алға бағыртыу һәм артабан үҫтереү буйынса һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ пландың бурыстарын хәл итә.

Үҙенең эшен аныҡ уйлап төҙөлгән план буйынса алып барған, хеҙмәтсәндәрҙең киң массаһына таянып эш иткән, кадрҙарҙы һайлап алыу һәм уларҙы тәрбиәләү менән, үтәлеште тикшереү менән систематик рәүештә шөғөлләнеүсе урындағы Совет дөйөм государство бурыстарын үтәү өсөн көрәштә ысын-ысынлап массаларҙы ойоштороусы булып тора.

Дөрөҫ һәм яҡшы ҡуйылған ойоштороу-массовый эш хеҙмәтсәндәр депутаттарының бөтә эшмәкәрлегенең нигеҙе булып тора.

Партиябыҙҙың XVIII съезында Михаил Иванович Калинин былай тине: Советтәрҙең ойоштороу-массовый эше «конкрет административ һәм политик сараларҙа, хужалыҡ һәм культура эштәрендә күренә. Совет органдары тарафынан тормошҡа үткәрелә торған бөтә сараларҙы халыҡҡа аңлатыу, массаларҙы был сараларҙы тормошҡа ашырыу эшенә ылыҡтырыу — бына шулар Советтәрҙең массовый эше булып торалар инде. Советтәр бына ошо массовый эш ярҙамында массаларҙы туплайҙар һәм ойошторалар».

Һайлауҙар осоронда республикалағы урындағы Советтәрҙең байтағының эше бик урынлы һәм нығыт тәнҡитләнде; был тәнҡит Советтәрҙең эше менән хеҙмәтсәндәрҙең айырыуса ҡыҙыҡһыныуҙарын, улар тарафынан үткәрелә торған бөтә эштә Советтәргә ярҙам итергә ынтылыуҙарын көүҙәләндерҙе.

Совет органдарының ҡайһы бер етәкселәре Совет алдына һәм уның башҡарыусы һәм үтәүсе органдары алдына ҡуйыла торған төп талаптарҙы — бөтә эште Конституция нигеҙендә һәм киң демократияны эҙмә-эҙле рәүештә үткәреү нигеҙендә төҙөргә тигән талаптарҙы онотҡандар.

Советтәрҙең сессиялары онотҡанда бер генә үткәрелгән, шуның һөҙөмтәһендә, райондарҙың, ҡалаларҙың, ауылдарҙың хужалыҡ һәм культура тормошондағы иң мөһим мәсьәләләр ваҡытында тикшерелмәй ҡалған. Даими комиссиялар, депутаттар, хеҙмәтсәндәрҙең киң активе Советтәрҙең эшенә ылыҡтырылмаған. Партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарының һәм шулай уҡ үҙ ҡарарҙарының үтәлешен тикшереү юҡ, кадрҙарҙы һайлап алыу һәм уларҙы тәрбиәләү урынына совет работниктәрен һәм, бигерәк тә, ауыл Советтәренең председателдәрен һәм секретарҙарын йыш алмаштырыу кеүек ярамһыҙ практика менән шөғөлләнгәндәр. Ошо сәбәптәр арҡаһында ҡайһы бер район Советтәренең исполкомдары ҡоро администраторлыҡ юлына баҫҡандар, үҙ эштәрендә бюрократизмға юл ҡуйғандар, хеҙмәтсәндәр массаһынан айырылғандар, уларҙы совет органдарының эшенә йоғонто яһау мөмкинлегенән мәхрүм иткәндәр.

Беҙҙә әле, үкенескә ҡаршы, хәҙер ҙә шундай исполкомдар бар: Әбйәлил, Зианчура һәм Иглин район Советтәре исполкомдары массалар менән, депутаттар һәм актив менән насар бәйләнештәләр һәм бөтә эште бары тик үҙҙәренең аппараттары менән генә үткәрергә тырышалар һәм райондарының хужалығына етәкселек итеүҙә канцелярия-бюрократик метод менән эшләүҙән айный алмайҙар.

Урындағы Советтәргә һайлауҙар ойоштороу-массовый эште тамырынан уҡ яҡшыртыу өсөн яҡшы шарттар тыуҙырҙы. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәренә һайлауҙарҙан һуң үткән ваҡыт эсендә республикалағы күп Советтәрҙең эше йәнләнде, уларҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнә етәкселектәре яҡшырҙы.

Сессияларҙы регуляр рәүештә саҡырыу Советтәрҙең эшендә нигеҙ ойоштороу формаларының береһе булып тора; был бөтә совет эшен күтәреүҙе тәъмин итә. Сессия халыҡ вәкилдәре аша уның ихтыярын көүҙәләндереүсе берҙән-бер полномочлеле орган булып тора.

Сессияларҙы үткәреү — ойоштороу-массовый эшенең төп һәм бик әһәмиәтле формаһы булыуға ҡарамаҫтан, ул 1947 йылда республикабыҙҙың күп Советтәре тарафынан һис тә ҡәнәғәтләнерлек рәүештә үткәрелмәне.

Матрай, Әлшәй, Ауырғазы, Бөрйән, Нурмәкәй, Йылайыр, Покровка, Хәйбулла райондары кеүек райондар бөтә 1947 йыл буйына бер-ике генә сессия үткәрҙеләр, был райондарҙың ҡайһы бер ауыл Советтәрендә бөтә йыл әйләнәһенә бер генә сессия ла саҡырмағандар.

Ләкин, сессияларҙы ойоштороуҙа һәм уларҙы үткәреүҙә беҙҙә әле һаман да ҙур етешһеҙлектәр бар. Бигерәк тә Воскресен, Зианчура, Ҡалтасы, Әбйәлил һәм Маҡар райондарында ауыл Советтәренең сессияларын саҡырыу сроктары боҙола.

Сессияларҙы саҡырыу срогын һәр бер боҙоу ваҡиғаларын Конституцияны тупаҫ рәүештә боҙоу тип һәм совет демократияһы нигеҙҙәрен өҙөү тип баһаларға кәрәк. Район Советтәре исполкомдарына, үҙ нәүбәттәрендә ауыл һәм поселка Советтәре сессияларын саҡырыуға систематик рәүештә контроль яһарға, сессиялар саҡырыуҙың Конституцияла күрһәтелгән сроктарын боҙоу ваҡиғаларына юл ҡуймаҫҡа кәрәк.

Совет исполкомдарының председателдәренә, сессиялар ҡарарҙарының, һис кисекмәҫтән, башҡарыусыларға еткерелеүенә һәм уларҙың үтәлешен даими тикшереп барыуҙы тәъмин итеү эшен үҙ контролдәренә алырға кәрәк.

Советтәрҙең даими комиссиялары Советтәрҙең практик эшенә депутаттарҙы ҡатнаштырыуҙа, шулай уҡ киң ҡатлам хеҙмәтсәндәр массаһын эшкә ылыҡтырыуҙа государство менән етәкселек итеүҙең иң мөһим формаларынан береһе булып тора.

Республиканың Советтәрендә даими комиссияларҙың яҡшы эш миҫалдары күп. Туймазы, Бәрә, Мәсетле, Баймаҡ райондарында һәм Черниковск ҡала Советында даими комиссияларҙың эше яҡшы ойошторолған.

Ләкин, республиканың күп кенә Советтәрендә комиссияларҙың эшен тейешенсә активлаштыреуға өлгәшкәнебеҙ юҡ әле. Быны туранан-тура әйтергә кәрәк. Әбйәлил, Зианчура, Абзан һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙа даими комиссиялар насар эшләйҙәр йәки бөтөнләй эшләмәйҙәр.

Район, ҡала, ауыл һәм поселка Советтәренең исполкомдары даими комиссияларҙың эшенә бөтә яҡлап ярҙам күрһәтергә тейештәр.

Советтәрҙең исполкомдары үҙҙәренең эшендә Советтәрҙең даими комиссияларына таянырға, улар менән йышыраҡ кәңәшләшеп торорға, уларҙың иғтибарын ауыл йәки ҡала тормошоноң төп мәсьәләләрен хәл итеүгә йүнәлдерергә тейештәр.

Советтәрҙең уңышлы эшләүе бөтәһенән элек һәр бер депутаттың активлегенә бәйләнгән. Депутаттар актив государство эшенә ни тиклем тулыраҡ ылыҡтырылһалар, улар һайлаусылар менән ни тиклем тығыҙыраҡ бәйләнеш тотһалар, Советтәр үҙҙәренең үҫә барған бурыстарын шул тиклем уңышлыраҡ үтәрҙәр.

Башҡортостандың урындағы Советтәренә халыҡтың 24.011 вәкиле һайланды. Уларҙың күпселеге хужалыҡ һәм культура төҙөлөшө мәсьәләләрен тикшереүҙә һәм хәл итеүҙә актив ҡатнашалар.

Мәҫәлән, Бәрә районы Симкин ауыл Советының депутаты — даими эшләүсе бюджет-финанс комиссияһының председателе Николаеваның инициативаһы менән налог һәм башҡа средстволарҙы йыйыу буйынса халыҡ араһында ҙур эш алып барыла. Ауыл Советының средстволар туплау планы ай һайын арттырып үтәлә.

Яңауыл районында район һәм ауыл Советтәренә һайланған һәм туранан-тура колхоз производствоһында эшләүсе 184 депутаттың бөтәһе лә эш нормаларын арттырып үтәй һәм колхоздарҙа социалистик ярыштың инициаторы булып тора. Район Советы депутаты — Байғужа МТС-ының трактор бригадаһы бригадиры, райондағы трактор бригадалары ярышының инициаторы Зиязов тракторҙа 1250 гектар ер һөрөргә йөкләмә алды. Иптәш Зиязов бригадаһы был йөкләмәне намыҫ менән үтәй.

Юғарыла әйтеп үтелгән миҫалдар урындағы Советтәрҙең депутаттарының инициативаһы, государство, хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөндә уларҙың активлегенең үҫеүен дәлилләй.

Советтәрҙең бурысы депутаттарҙың үҙҙәренең өлгөлө эштәре менән бөтә хеҙмәтсәндәрҙе ауылдарҙың һәм ҡалаларҙың хужалыҡ һәм культура төҙөлөшөнә йәлеп итеүҙәренә өлгәшеүҙән тора.

Һайлау кампанияһы барышында хеҙмәтсәндәр Советтәрҙең эштәрен яҡшыртыу буйынса бик күп тәҡдимдәр индерҙеләр, улар алдына бурыстар ҡуйҙылар, властың айырым органдарының, айырым работниктәренең етешһеҙлектәрен тәнҡит иттеләр.

Депутаттар һәм Советтәрҙең исполкомдары һайлаусыларҙың тәҡдимдәре һәм наказдары нисек үтәлеүен систематик рәүештә күҙәтергә, был турала һайлаусылар алдында әленән-әле отчет бирергә тейештәр.

Район Советтәренең исполкомдары үҙҙәренең бөтә ойоштороу-массовый эшендә төп иғтибарҙы ауыл Советтәренең эшенә дөрөҫ һәм даими етәкселек итеүгә йүнәлдерелергә тейештәр.

Район Советы исполкомының ауыл Советтәренә етәкселек итеүендә үтәлеште тикшереү төп звено булып тора. Ауыл Советтәренең эшен систематик рәүештә урында нығыт тикшерергә, уларҙың эшендә булған етешһеҙлектәрҙе күрһәтергә һәм тикшереү барышында ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү һәм эште тәртипкә килтереү өсөн ауыл Советтәренә ярҙам итергә кәрәк.

Ауыл Советтәренең эшен яҡшыртыу һәм уларҙың ойоштороусылыҡ ролен күтәреү өсөн иң әһәмиәтле юлдарҙың береһе булып социалистик ярыш тора. 1947 йылда йәйелдерелгән ярыш һөҙөмтәһендә ауыл Советтәренең эше байтаҡ яҡшырҙы.

Республикабыҙҙың ауыл Советтәре ауыл хужалығы эштәрен яҡшы үтәү өсөн, ойоштороу-массовый эшен яҡшы ҡуйыу өсөн Силәбе өлкәһе ауыл Советтәренең социалистик ярышҡа саҡырыуҙарын ҡабул иттеләр. Советтәрҙең исполкомдары ярышҡа шулай етәкселек итергә тейештәр, ул етәкселек беҙгә Силәбе өлкәһенең ауыл Советтәре менән ярышта еңеп сығыуҙы тәъмин итһен.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәр депутаттары Советтәре, колхозсыларҙы урожай йыйнауға уңышлы һәм өлгөлө әҙерләнеү һәм государствоға иген тапшырыу планын үтәү, юғары урожай алыу өсөн, ауыл хужалығы эшсәндәре иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе тулыһынса үтәү өсөн көрәшкә ойошторорға тейештәр.

«Ойоштороу эшендә төп нәмә — тип өйрәтә иптәш Сталин, — был кешеләрҙе һайлап алыу һәм үтәлеште тикшереү».

Етәкселек итеүҙең большевистик принцибе, ҡарар ҡабул иткәндән һуң, ул ҡарарҙы үтәүҙе тәъмин итерлек саралар билдәләүҙе һәм ул сараларҙы тормошҡа ашырыуҙы талап итә. Бөтә шарттарҙа ла үтәлеште ойоштороға кәрәк, был иһә, күп һанлы Совет һәм хужалыҡ кадрҙарын актив эшкә ылыҡтырыу тигән һүҙ. Кадрҙар менән эшләргә, уларға практик ярҙам күрһәтергә, инструктаж бирергә — контролдең иң әһәмиәтле яҡтары бына шул.

Үтәлеште тикшереү Совет органдарының эш стиле булырға тейеш. Тәнҡит һәм үҙ-үҙеңде тәнҡит үтәлеште тикшереүҙең бик мөһим шарты булып тора. Шуға күрә Совет активы менән кәңәшмәләр, депутаттарҙың үҙ һайлаусылары алдында отчеттары менән ауыл йыйылыштары һәм Советтәрҙең сессияларында исполкомдарҙың отчеттарын ҡуйыуға айырыуса әһәмиәт бирергә кәрәк.

Депутат иптәштәр!

Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды үтәүгә һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумының һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһындағы ҡарарын һис һүҙһеҙ тормошҡа ашырыуға халыҡтың бөтә көстәрен туплау буйынса республиканың Советтәре алдында яуаплы бурыстар тора.

Башҡортостан государство власе органдары — хеҙмәтсәндәр депутаттарының Советтәре ауыл хужалығы өлкәһендә лә, шулай уҡ промышленность һәм культура төҙөлөшө өлкәһендә лә үҙҙәренә йөкмәтелгән бурыстарҙы партияға етәкселегендә намыҫ менән башҡарып сығырҙар тип нығыт ышаныс белдерергә мөмкин итегеҙ.

Йәшәһен беҙҙең Бөйөк Тыуған илебеҙ — Совет Социалистик Республикалар Союзы!

Йәшәһен беҙҙең партиябыҙ Ленин—Сталин партияһы!

Йәшәһен бөйөк юлбашсыбыҙ һәм уҡытыусыбыҙ иптәш СТАЛИН!

Сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләү—юғары урожай алыуға мөһим шарт

✪ ✪ ✪

Бөтә кешеләр катнашлығында

ЯНАУЫЛ. (Телефон аша). Һуңғы көндәрҙә булып үткән ямғырҙар сәсеүлектәрҙең үҫеүенә уңайлы шарттар тыуҙырҙы.

Колхозсылар бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға яҙған хатта бирелгән вәғәҙәне үтәү өсөн сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе яҡшы ойошторҙолар. Утауҙа ҡарттар ҙа һәм балалар ҙа ҡатнашалар. Эш бөтә эш буйынса бара. «Красный удар» колхозы районда беренсе булып бөтә майҙанда сәсеүлектәрҙе тәүге тапҡыр утауҙы тамамланы.

Алдынғылар сафында барған «Красный Октябрь» һәм «Азат» колхоздары ла 10 июндә бөтә сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙарттылар. Район буйынса инде 18 мең гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары ҡый үләндәренән уталды.

—☆—

Утау яҡшы ойошторолдо

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Колхоздарҙа массауи рәүештә сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу алып барыла. Утауға төшеүҙең тәүге дүрт көнө эсендә 4 мең гектарҙан артыҡ майҙанда утау үткәрелде.

«Яңылыҡ», «Искра», «Октябрь», «Өрген» колхоздарында эш айырыуса яҡшы ойошторолған. Уларҙа бөтә колхозсылар ҙа эштә ҡатнаша. Көндәлек нормалар арттырылып үтәлә.

—☆—

Орлоҡ участкаларын ҡый үләндәре баҫҡан

АҠЪЯР. (Телеграф аша). Хәйбулла районының күпселек колхоздарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү әле булһа ла ойошторолмаған. Уның арҡаһында колхоздарҙың дөйөм майҙандарында ғына түгел, орлоҡ участкаларында ла сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре баҫҡан.

«Красное знамя» колхозында (председателе иптәш Уренцев) сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләгән иптәш Маслов звеноһы үткән йыл һәр гектарҙан 132-шәр бот урожай алғайны. Был тәжрибәне артабан тағы ла тулыраҡ ҡулланырға кәрәк ине. Ләкин колхоз етәкселәре был турала оноттолар. Яҙ көнө сәсеүлектәргә тәрбиә ойошторолманы, хәҙер ҙә ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш алып барылмай. Инициативалы звеновод иптәш Маслов быйыл баҫыусылыҡ бригадаһына учетчик итеп ҡуйылған.

Бындай хәлде районың башҡа колхоздарында ла күрергә була.

— Беҙҙең орлоҡсолоҡ звеноһы быйыл яҙ 97 гектар һабан ашлыҡ культуралары сәсте. Шулай уҡ звеноның 10 гектар ужымы ла бар ине. Ләкин колхоз правлениеһе сәсеү тамамланыу менән звеноны бөтә 16 кешене бригадаларға таратты. Хәҙер звеноның сәсеүлектәрен ҡый үләндәре баҫты, —ти «Яңы юл» колхозы члены иптәш Әхмәт Мәмбәтов.

«Салихъян» колхозында ла орлоҡ участкаһындағы сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре ҡаплаған, ә звеновод иптәш Әлибаева ат ҡарауысы итеп ҡуйылған.

«Новый путь» колхозында (председателе иптәш Павлов) шулай уҡ утау ойошторолмаған. Уталырға тейешле булған 1588 гектар сәсеүлектең ни бары 66 гектары ғына ҡый үләндәренән таҙартылған. Кириченко һәм Катриченко иптәштәрҙең звенолары башҡа эштәр менән шөғөлләнәләр. «Новая жизнь» колхозында ла звенолар тарҡалғандар. Ә бында утау планы ни бары 11 процентҡа ғенә үтәлгән.

Район ауыл хужалығы бүлеге һәм уның специалистары сәсеүлектәр тәрбиәләүҙе ойоштороуҙа колхоздарға ярҙам итмәйҙәр. Агрономдарҙан Ванюков, Глущенко һәм Зарипова иптәштәр колхоздарҙа һирәк булалар.

Районда ҡый үләндәренә ҡаршы яҡшы көрәшкән хужалыҡтар ҙа бар. «Переволочан» колхозында иптәш Салогуб етәкселек иткән орлоҡсолоҡ звеноһы үҙ участкаһында 148 гектар һабан ашлыҡ культуралары һәм 3 гектар майлы культуралар сәсеүлеген бер ҡат утауҙы тамамланы. Шулай уҡ колхоздың дөйөм сәсеүлегендә лә утау эше уңышлы бара. «Красный Байкал» колхозында Богомолова һәм Тангаева иптәштәрҙең звенолары ла юғары урожай өсөн тырышып эшләйҙәр. Утауҙа көн һайын 50—60 кеше ҡатнаша. Пугачев исемендәге колхозда иптәш Николаев звеноһы 25 гектар бойҙай һәм 4 гектар һоло ҡый үләндәренән таҙартты.

Ләкин район ауыл хужалығы бүлеге алдынғыларҙың тәжрибәләрен күрмәй. Юғары урожай өсөн көрәштә бындай иғтибарһыҙлыҡҡа артабан урын булырға тейеш түгел.

Н. Демидов,
Р. Шафикова.

✪ ✪ ✪

Звенолар ҡайҙа?

— Орлоҡсолоҡ звеноғыҙ ҡайҙа, звеновод кем? — тип һораныҡ беҙ баҫыусылыҡ бригадаһы бригадире иптәш Хөсәиновтан.

— Ғәләлова булай, үҙем дә белмәйем, — тип яуап бирҙе бригадир.

Иптәш Ғәләлованы эҙләп табырға тура килде. Ул үҙенең звеновод түгел икәнлеген белдерҙе һәм колхоз председателе иптәш Хоҙайбирҙиндән һорарға ҡушты.

Мәсетле районының «Красная Башкирия» колхозында ҡыш көнө 5 звено ойошторолдо, уларҙың һәр ҡайһыһына 16-шар колхозсы беркетелде. Шуның менән эш бөттө. Һөҙөмтәлә хәҙер хатта орлоҡсолоҡ звеноһының булыуы-булмауы, звеноводтың кем икәнлеген дә бында белмәйҙәр.

Звеноларға участкалар беркетелмәгән. Бында хеҙмәтте звено тәртибендә ойоштороуҙың өҫтөнлөгөн баһаламайҙар. Колхоз председателе лә, бригадирҙар ҙа звенолар менән эшләүҙе мәшәҡәтле эш, тип кенә һанайҙар.

Күптән түгел ошондай хәл булды. Председатель иптәш Хоҙайбирҙин звеновод Камаловты саҡырып алды.

— Звеноң нәмә эшлай?

— Ҡайҙа ҡушһалар, шунда эшләйбеҙ.

— Эште йәнләндерергә кәрәк!— Ул тәҙрә янына барҙы. — Әнә күрәһеңме бойҙай сәселгән баҫыуҙы? Шунан үҙең өсөн 15—30 гектар участка бүлеп бирербеҙ, шунда эшләрһегеҙ.

Эш ошо һөйләшеү менән тағы ла тамамланды. Участкалар бүленеп бирелмәне, звеноларҙың эше йәнләндерелмәне. Колхозсылар, звеноводтар күп кенә тапҡыр колхоз правлениеһына, бригадирҙарға звеноларҙы нығытыуҙы һорап мөрәжәғәт иттеләр, ләкин уларҙың инициативаһына иғтибар ителмәне. Шуның арҡаһында баҫыу эштәрен үткәреүҙә ҙур етешһеҙлектәр йәшәй. Бына утау ваҡыты, ләкин сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәре алып барылмай.

Чапаев исемендәге колхозда ла ике звено ойошторолған, тип иҫәпләнә. Ләкин улар сәсеү ваҡытында үҙ участкаларында эшләмәнеләр. Звеноводтар — Ҡоҙулина, Окулова иптәштәр бригадирҙар тарафынан икенсе дәрәжәләге эштәргә ҡушылдылар, ә беркетелгән орлоҡ участкалары иғтибарһыҙ ҡалды. Звеноларҙың эшенә айырым иҫәп алып барылманы.

Ошондай уҡ хәлде Мәсетле районының башҡа күп кенә колхоздарында ла осратып була. Улар бөтәһе лә звеноларҙы нығытыуға колхоз һәм район ауыл хужалығы бүлеге етәкселәре тарафынан иғтибар бирелмәүе тураһында һөйләйҙәр.

— Беҙҙә быйыл звенолар менән эш яҡшы, — ти район ауыл хужалығы бүлегенең баш агрономы иптәш Хәмитов. — Яңынан 112 звено ойошторолдо.

Бындай маҡтаныуҙар бик урынһыҙ. Звеноларҙың эше менән бында ҡыҙыҡһынмайҙар, уларҙы ойоштороу һәм нығытыу өсөн бер төрлө лә сара күрелмәй. Мәсетле районында звеноларҙы баһаламау ҡасанға тиклем дауам итер икән?

Н. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

—☆—

„Сәселгәс, үҫер әле...“

Баймаҡ районы колхоздарында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, ҡый үләндәренән таҙартыу эше менән бик аҙ шөғөлләнәләр. Район ауыл хужалығы бүлеге (мөдире Әмиров, баш агрономы Вәхитов иптәштәр) был эштә колхоздарға оператив етәкселек итмәй, кабинетта ултырып «күрһәтмәләр» яҙыу менән генә сикләнәләр. Ә сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре баҫа.

Калинин исемендәге колхозда (председателе иптәш Надькин) бөтә сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре ҡаплаған, улар ашлыҡтарҙың үҫеүенә ҙур ҡуркыныс тыуҙыралар. Ләкин бында утау ойошторолмаған. Утауҙа көн һайын 100 кеше ҡатнашырға мөмкин булыуға ҡарамаҫтан, 25—30 кеше генә эшкә йөрөй. Был эш башлыса үҫмер балаларға ғына тапшырылған. Шуға күрә ошо көнгә тиклем тәүге тапҡыр утау планы ни бары 15 процентҡа ғенә үтәлде.

Молотов исемендәге колхозда ла (председателе иптәш Бикбаев) утауҙа 23 кеше генә ҡатнаша. Иптәш Рәхмәтуллов бригадаһынан башҡа бригадаларҙа сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу әле булһа башланмаған.

Районың башҡа бик күп колхоздарында ла шундай уҡ хәл. «Победа», «Красный партизан», Чапаев, Ворошилов исемендәге һәм башҡа колхоздарҙа ла көн һайын ни бары 15—20 генә кеше баҫыуға эшкә йөрөй.

— Сәстек, үҫер әле, — тиҙәр был колхозларҙың етәкселәре. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү һәм утау эшен кәрәкһеҙ, артыҡ мәшәҡәт итеп ҡарайҙар.

И. Зарипов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Ниңә йыйылышта мастерҙәр һөйләмәне?

Машиналар төҙөү заводының йөкләмәләрҙе эшселәрҙе «Ударник» клубында йыйылыш йыйылды. Көн тәртибендә торған мәсьәлә — рентабелле эшләүгә өлгәшеү. Мастерҙәрҙең бурысы тураһында һөйләнде. Заводтың коллективе был эшкә етди ҡараны.

Доклад менән завод директоры һөйләне. Ул үҙ докладында завод эшенең етешһеҙлектәрен асып һалды. Әгәр 1947 йылда завод эшләнгән продукцияны үҙ ваҡытында сығарһа, һәм брак ҡыҫҡартылһа, зыян күпкә кәмер ине.

Доклады үҙенең сығышында, әгәр һәр бер цехта экономия ҡайһы мөмкинлектәр барлығын һөйләне. Технологик дисциплинаны һаҡламау арҡаһында төрлө деталдәр буйынса күп брак яһауға юл ҡуйыла. Бракта ярҙамының айырым эшселәрҙең һәм бригадирҙарҙың ғәйебе менән килеп сыға. Ләкин уларҙың сәбәптәре тикшерелмәйҙәр һәм брак яһауҙа ғәйеплеләр

материаль яуаплылыҡҡа тартылмайҙар.

Хеҙмәт методтарын киң индереү һәм производствоны камиллаштырыу сығымдарын түбәнәйтеүгә ҙур резерв асып һалыр ине. Ләкин был мәсьәләләргә етәрлек иғтибар бирелмәне.

Рентабелле эшләүгә өлгәшеү юлдарын күрһәтә алырҙай иң белемле кешеләр — мастерҙәр бит. Ләкин йыйылышта уларҙың береһе лә сығыш яһаманы. Тегеләй йәки был мастерҙең материалдары һәм хеҙмәт ресурстары артыҡ тотоноуға юл ҡуймай эшләүе һәм айырым участкаларҙың конкрет мисалдарын күрһәтмәне.

ВКП(б) Ҡала Комитетенең заводтағы парторгы Толмачев, лаборатория начальнигы Соколов иптәштәр үҙҙәренең сығыштарында мастерҙәр менән эш алып барыуҙың хеҙмәт методтарын индереүҙе тураһында һөйләнеләр. Завод директоры иптәш Ферин сығышында Мәскәү ҡалаһындағы «Калибр» заводы мастеры Н. Российскийҙың тәжрибәһен ҡулланыуҙы мастерҙарҙан айырыуса экономияға ынтылыу ихтыяжына тураһында һөйләне.

Заводтың етәксе работниктары Овданенко, Воловик иптәштәр мастерҙарҙың бурыстарына тик дөйөм рәүештә генә ҡағылдылар.

Йыйын айҡында, мастерҙарҙың йыйылышта бик аҙ ҡатнашыуы, ошондай уҡ мөһим мәсьәлә тикшереүгә завод һәм цех етәкселәренең ҡомһыҙ әҙерләнеүҙәрен күрһәтте. Предприятиеның рентабеллеге өсөн көрәште ойоштороуҙа, алдынғыларҙың тәжрибәләрен таратыуҙа завод һәм цех етәкселәре мастерҙар менән эшләүгә айырыуса яуаплы ҡарарға, серьез иғтибар бирергә тейештәр.

Н. Наймушин.

—☆—

Сауҙа эштәрен халыҡ талабына яуап бирерлек итеп ойошторорға

(Редакцияға килгән хаттарға күҙәтеү)

Беҙҙең социалистик илебеҙҙә халыҡтың материаль көн-күреше яҡшыра барған һайын, уның сауҙа работниктәре алдына ҡуйған талабы ла шул тиклем арта бара. Партия һәм хөкүмәт хеҙмәтсәндәрҙең үҫә барған талаптарын төрлө яҡлап тәьмин итеү сараһын күрә. Был бурыс сауҙа работниктәренең ҙур етеҙлек менән ныҡышмалы рәүештә эшләүҙәрен талап итә.

Ләкин редакцияға килгән хаттарҙың күбеһе урындағы ҡайһы бер сауҙа учреждениеларҙың ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүҙәре тураһында һөйләйҙәр.

Мәҫәлән, Архангель районында сауҙа эштәре сиктән тыш насар ойошторолған. Райпотребсоюздың һәм сельполарҙың магазиндарында халыҡтың көндәлек тормошона кәрәкле тауарҙар бик һирәк булалар. Райпотребсоюз председателе иптәш Кулаковтың үҙ эшендә һалҡынлыҡ күрһәтеүе һөҙөмтәһендә Башсоюздан наряд буйынса бирелгән фондовой тауарҙар ваҡытында тулыһынса ҡайтарылмайҙар. Район Советы исполкомының сауҙа эшен тейешле контролгә алмауы арҡаһында совет сауҙаһын боҙоуға юл ҡуйылған. Оноҡ-ҡандан-онотҡанға килгән промтауарҙар ҙа асыҡ һатыу рәүешендә түгел, ә район Советының сауҙа бүлеге тарафынан төҙөлгән исемлек буйынса һатылалар.

Баймаҡ районының «Урал» колхозы члены иптәш Арсланов Ғәйнислам, «Ҡыҙыл Башҡортостан» редакцияһына яҙған хатында: «Беренсе Этҡол сельпоһы хеҙмәтсәндәрҙе культуралы сауҙа менән ҡасан тәьмин итер икән?», тиған һорау ҡуя.

Был бик урынлы һорау. Сөнки Беренсе Этҡол сельпоһы үҙенең эшен халыҡтың үҫә барған талабына яуап бирерлек итеп ойошторғаны юҡ әле. Был ғына ла түгел, сельпо председателе иптәш Үзбәков хатта, хеҙмәтсәндәргә икмәк бешереп һатыу өсөн ебәрелгән ашлыҡты такта, трасса һәм башҡа төҙөлөш материалдарына алыштырып әрәм-шарәм итеүгә тиклем барып еткән.

Бында промышленность тауарҙары совет сауҙаһының закондары буйынса һатылмайҙар, ә күберәк өләшә «таныш-белештәргә»—спекулянттарға оҙатыла. Мәҫәлән, 17—18 майҙа сельпоға бик күп һанда промтауар килә. Ул тауарҙарҙы «баҫыуға илтеп, колхозсыларға һатабыҙ», тигән һылтау менән алып киталар ҙа, колхозсыларға барып етмәйенсә ҡайҙалыр туҙҙырып ҡайталар.

Иәрмәкәй районы Тарҡаҙы сельпоһы, Белорет районы Зигаҙы сельпоһы, Салауат районының Арҡауыл сельпоһында ла совет сауҙаһын тупаҫ рәүештә боҙоуҙары, колхозсыларҙы көндәлек тормошта кәрәк булған тауарҙар менән регуляр рәүештә тәьмин итә алмауҙары тураһында хәбәр итәләр. Был кәмселектәр район һәм ауыл Советтарының сауҙа учреждениеларе эштәрен тейешле контролгә алмауҙарынан һәм уларға практик ярҙам күрһәтмәүҙәренән килеп сығалар.

Урындағы Совет органдары ҙа шәп килгән был хурлыҡлы кәмселектәрҙе ашығыс бөтерергә, сауҙа работниктарен совет закондарын һәм үҙҙәренең хеҙмәттәрен һөйөү рухында тәрбиәләргә тейештәр.

—☆—

Апробация курстары

Башҡортостан ауыл хужалығы Министерствоһы Өфөлә өлкә агрономдар йортонда 450 кешелек апробация курстары үткәрә. Бында сәсеү орлоҡтарының һәм сәселгән ашлыҡтың сифатын билдәләү буйынса специалистар әҙерләнә.

Был курс өс сменала үткәрелә. Һәр бер сменала 150-шәр кеше уҡыясаҡ. Апробация курстарына район һәм колхоз агрономдары киләсәк.

Был курста ашлыҡҡа апробация яһауҙы агрономдар уҡ көн эсендә 90—100 сәғәтлек лекция һәм докладтар тыңлаясаҡтар. Агрономдарҙы ауыл хужалығы институты преподавателдәре, Ауыл хужалығы Министерствоһының юғары квалификациялы агрономдары уҡытасаҡтар.

Ишембай—Ермолаевка тимер юл төҙөлөшөндә

Уҡыу өйө—трассала

МӘЛӘҮЕЗ. Нур-дәүләт ауылы советы ерҙәгендәге уҡыу өйө Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөү башланған көндән уҡ трассаға күсерелде. Төшкө ял ваҡыттарында иптәш Нур-дәүләт ауылы колхозсылары уҡыу өйө мөдире иптәш Ишгарин Зәйни тыңлауына һөйләшәләр.

Уҡыу өйө — походтағы төҙөүселәр өсөн ял урыны ла. Бында журналдар, газеталар, шашка бар. Колхозсылар эштән һуң ошонда ял итәләр, газета, журналдар уҡыйҙар. Әңгәмәләр үткәрелә.

Колхозсылар эштән һуң ял итә алалар. Өҫтәлдә шашка, шахмат бар. Гармонсылар төрлө уйындар ойошторалар.

Иптәш Ишгарин Нур-дәүләт ауылы Советына трассала эшләүсе колхозсылар өсөн трассала ашханә асыу зарурлығы тураһында тәҡдим индерҙе. Уның был тәҡдиме ҡабул ителде. Хәҙер Нур-дәүләт ауылы Советы трассала ашханә ойошторҙо.

Был ашханәлә колхозсылар өсөн көндәлек ике тапҡыр ҡайнар аш бирелә. Уның хеҙмәтен 20 процент колхозсы файҙалана.

Нур-дәүләт ауылы Советы трассала ашханәнең эшен тикшереп тора.



Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөү республика хеҙмәтсәндәренең ҙур рух күтәренкелеге менән ҡаршыланды.

Һүрәттә: Мияҡа районының колхозсылары яңы тимер юл төҙөлөшөнә бараларҙ.

В. Жданов фотоһы.

Медицина ярҙамы насар ойошторолған

Яңы тимер юл төҙөлөшөндә эшләүселәргә санитария ярҙамы күрһәтергә күп һанлы кадрҙар бүленде. Бында врачтар, фельдшерҙар һәм шәфҡәт туғандары эшләй.

Пункттар тейешле урындарҙа урынлашмаған. Мәҫәлән, Мияҡа районы буйынса «Сталь» колхозының трассала эшләүсе колхозсыларына медицина ярҙамы күрһәтеү насар ойошторолған.

Пункттың етәксеһе врач Мапренкий ҙә тейешле эш алып бармай.

Ф. Ибраһимов.

Задание үтәлде

Стәрлетамаҡ районының Карл Маркс исемендәге колхозы 4 көндә, йәғни 13 июнгә үҙенә бирелгән заданиены үтәне. Бында бер мең кубометрҙан артыҡ ер ҡаҙылды. Был алдынғы колхоз өсөн ҡыҙыл байраҡ күтәрелде.

Заданиены тамамлау уңайы менән митинг булды. Унда Карл Маркс исемендәге колхоз трассала эшләүсе 65 алдынғы эшсегә хөрмәтле билдәләр бирелде. Улар араһында коммунист Мансур Садиков, колхозсылар Сания Әҙерхина, Хәбира Ғәбиева, ер ҡаҙыусы эшләүсе 65 йәшлек Ғәли бабай Ишмөратов һәм башҡалар бар.

—☆—

Берҙәм рәүештә

Бишбүләк районынан 400 колхозсы һәм 80 ылау Ермолаевка—Ишембай тимер юлын төҙөүгә килеп, берҙәм эшкә тотондолар.

Район етәкселәре колхозсыларҙы трассала эшләүгә алдан әҙерләнделәр. Колхозсыларға көрәк, кәйлә, балта һәм башҡа эш ҡоралдары менән тәьмин иттеләр.

Колхозсылар менән берлектә трассаға район етәкселәре үҙҙәре лә килделәр. ВЛКСМ-дың Бишбүләк район комитеты секретаре иптәш Ахунйәнов юл төҙөүҙә эшләүсе колхозсылар араһында политик-массовый эштәр ойоштора. Эштең беренсе көндәренән үк участкаларҙа «боевой листоктар» сығарыла башланды. «Ҡыҙыл трасса» газетаһы уҡыла.

Бишбүләк районы трассаһын даими тороуына ҡарамаҫтан, бында эшләүсе колхозсылар менән даими бәйләнеш булдырылған.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһының беренсе (учредительный) съезы

БУДАПЕШТ, 12 июнь. (ТАСС). Бөгөн кис тантаналы рәүештә Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһының беренсе (учредительный) съезы асылды. Съезд делегаттарынан һәм сит ил делегацияларынан башҡа залда милли-крәҫтиәндәр партияһы һәм вак ауыл хужалығы партияһы, профсоюздар советы, Венгрия демократик ҡатын-ҡыҙҙары союзы һәм башҡа демократик ойошмаларҙың вәкилдәре бар.

Ҡунаҡтар өсөн билдәләнгән ложаларҙа — республика президенте Тильди Золтан, премьер-министр Диньеш Лайош һәм Венгрия государство деятелдәренән башҡа кешеләр ултыралар.

Съезды Фаркаш Михаль асты. Үҙенең инеш һүҙендә ул эшселәрҙең ике партияһын берләштереүҙе ил эшселәренең, крәҫтиәндәренең һәм интеллигенцияһының быға тиклем күрелмәгән рухлылыҡ менән ҡаршылауын билдәләне. Берҙәмлек өсөн көрәш ауыр һәм көсөргәнешле булды, ләкин ул бушҡа булманы, беҙ эшселәрҙең берҙәм партияһын төҙөүгә өлгәштек, тине ул. Съезд делегаттары Фаркаштың тәҡдиме буйынса, Венгрияны азат итеү өсөн булған һуғыштарҙа һәләк булған Совет воиндарының иҫтәлеген аяҡ өҫтө баҫып хөрмәт итте.

Унан һуң хөкүмәт коалицияһына ингән крәҫтиәндәр партияларының, демократик ҡатын-ҡыҙҙар союзының, венгер йәштәренең вәкилдәре һәм сит ил делегаттары ҡотлау телмәрҙәре менән сығыш яһанылар.

Съезд Бөтә Союз коммунистар (большевиктар) партияһы Үҙәк Комитетенән алған ҡотлау телеграммаһын ҙур рухланыу менән тыңланы. Телеграммала былай тип әйтелә:

Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһының беренсе съезына

Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) партияһы Үҙәк Комитеты съезд делегаттарына ҡайнар сәләм ебәрә һәм Венгрия хеҙмәтсәндәренең берҙәм партияһын төҙөү менән ҡотлай.

Эшселәр партияларының хеҙмәттәшлеге һәм берҙәмлеге арҡаһында венгер халҡы Венгрияның бойондороҡһоҙлоғо өсөн, [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible].

Эшселәр партияларының берләшеүе, венгер эшселәр хәрәкәтенең тарихи вәҡиға булып торған был хәл — Венгрия хеҙмәтсәндәренең яңы уңыштарының залогы булып хеҙмәт итәсәк.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһына яңы халыҡ-демократик Венгрияның төҙөлөүендә уңыштар теләй.

Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) партияһы Үҙәк Комитеты.

12 июнь 1948 йыл.

БУДАПЕШТ, 13 июнь. (ТАСС). Бөгөн иртәнсәк Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһының съезында председатель Ронаи Шандорҙың инеш һүҙенән һуң Ракоши Матиас ҙур политик доклад менән сығыш яһаны. Докладының тәүге өлөшөндә Ракоши халыҡ-ара хәлгә ентекле анализ бирҙе.

Ракоши докладының махсус бүлеген Венгрия демократияһының экономик хәлен нығытыуға һәм үҫтереүгә арнаны. Ул, Венгрияның ауыл хужалығы һәм промышленность производствоһы былтыр һуғышҡа тиклемге кимәлгә етте, тип билдәләне. Промышленность производствоһы [illegible] [illegible] [illegible] 1938 йылғы кимәлгә етте. Хеҙмәт етештереүсәнлеге үҫә, хеҙмәт дисциплинаһы нығый, эшселәр һәм крәҫтиәндәр хеҙмәт хаҡы [illegible] бара. Быларҙың бөтәһе лә быйыл [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] тыуҙыра.

Экономик күтәрелеш һөҙөмтәһендә, тип дауам итте Ракоши, промышленность эшселәренең [illegible] һуғышҡа тиклемге кимәлгә етте, ә [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] [illegible] етте.

Ракоши, Венгрия демократияһы компартия етәкселегендә өс йыл ярым эсендә илдең экономик системаһын нигеҙҙән үҙгәртте, тип күрһәтте. Национализация һөҙөмтәһендә промышленностең, шахталарҙың һәм транспорттың байтаҡ өлөшө государство ҡулына күсте. Бөгөн промышленностең государство секторында һәм транспортта илдәге бөтә эшселәрҙең 86 проценте эшләй.

Венгрия демократияһын политик яҡтан нығытыу тураһында һөйләп, Ракоши, Венгрияла власть эшселәр синыфы һәм хеҙмәтсәндәр ҡулында тип билдәләне. Эшселәр синыфы, компартия етәкселегендә, өс йыл ярым эсендә ил менән идара итергә һәләтле булыуын күрһәтте, халыҡтың күпселеге тарафынан танылған алдынғы һәм хәл иткес көс булып әүерелде.

Венгрия халҡы араһында компартияның популярлығының бик ныҡ үҫеүен (ошо йылдың тәүге дүрт айы эсендә уның һаны 200 мең кешегә етеүе лә шуны дәлилләй) билдәләп, Ракоши эшселәрҙең ике партияһын бергә ҡушыу мәсьәләһенә күсте.

Ике партияны берләштереү өсөн яҡшы нигеҙләктәр, тине ул, социал-демократик партияның уң ҡанатын изоляциялауға өлгәшкәс коммунистарҙың дөрөҫ политикаһы арҡаһында тыуҙырылды. Үҙҙәрен берләшеүҙең дошмандары итеп танытҡан кешеләрҙе социал-демократтар үҙ сафтарынан коммунистар партияһы ярҙамында сығарып ташланылар. Социал-демократтарҙың марксизм-ленинизмде үҙҙәренең идеологик платформаһы итеп ҡабул итеүҙәре берләшеү өсөн икенсе бер тағы ла мөһимерәк нигеҙләк булды. Маркс—Энгельс — Ленин—Сталин учениеһе рухында берлектәге программ билдәләү төҙөлдө. Ул хәҙер съездың тикшереүенә индерелде.

Ракоши съезды үҙҙәренең уңыштарын арттырып баһаламаҫҡа, Венгрия демократияһының үҫешенә башланғысты кем биргәнлеге тураһында онотмаҫҡа саҡырҙы. Беҙҙең уңыштарыбыҙҙың төп һәм үҙәк пункты шунда: Советтар Союзы һәм Совет Армияһы венгер халҡы ҡулынан фашистик бығауҙарҙы алып ташланылар. Советтар Союзының азатлыҡ көрәше һөҙөмтәһендә реакцияның ҡоралы көсө һәм государство аппараты емерелде, беҙҙең үҫеүебеҙҙең һәм уңыштарыбыҙҙың базаһын төҙөү өсөн Советтар Союзы күп көс һалды. Һәм быларҙы, тине ул, бер генә минутҡа ла оноторға ярамай. Советтар Союзының экономик булышлығы Венгрия демократияһына бик ҙур ярҙам итте.

Съезда ҡатнашыусылар ораторҙың был һүҙҙәрен Советтар Союзы хөрмәтенә һәм уның ҡеүәтле армияһы хөрмәтенә, совет халҡының бөйөк юлбашсыһы Генералиссимус И. В. Сталин хөрмәтенә көслө алҡыштар менән ҡаршыланылар.

Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһы алдында торған бурыстар тураһында һөйләп Ракоши, Венгрияның милли бойондороҡһоҙлоҡ фронтын киң халыҡсылыҡ базаһында ҡайтанан үҙгәртеп ҡороу иң мөһим бурыстарҙың береһе булып тора, тип күрһәтте. Партияларҙың өҫтән генә булған хеҙмәттәшлегенә алмашҡа берҙәм массовый ойошма—бойондороҡһоҙлоҡ Милли Фронтын төҙөү кәрәк булды. Был фронтта политик партиялар менән бер рәттән ҙур общественный ойошмалар — профсоюздар, ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары, йәштәр ойошмалары һәм башҡа ойошмалар өсөн дә лайыҡлы урын тәьмин итергә кәрәк, — тине Ракоши.

Советтар Союзы менән дуҫлыҡ, халыҡ демократияһы илдәре менән тығыҙ хеҙмәттәшлек итеү, — тип дауам итте Ракоши, — беҙҙең партиябыҙ политикаһының нигеҙе булып тора.

Ракошиҙең докладын тамамлағандан һуң председателлек итеүсе венгер халҡының бөйөк дуҫы Генералиссимус И. В. Сталинға ҡотлау телеграммаһы ебәрергә тигән тәҡдим индерҙе. Был тәҡдим залда оҙаҡҡа һуҙылған көслө овация тыуҙырҙы. Телеграмманы уҡығандан һуң «Йәшәһен Сталин!» тигән тауыштар бик оҙаҡ тынмай торҙо.

Унан һуң ҙур доклад менән Сакашич Арпад сығыш яһаны.

Венгрияның йәш демократияһының үҫеүе, тине Сакашич, ижади марксизм эшселәр хәрәкәтенең үҫеш юлын билдәләүҙең иң яҡшы күрһәткесе булып торғанлығын, ике партияның хеҙмәттәшлегенең дөрөҫ булғанлығын ышанырлыҡ итеп раҫлай. Венгрия компартияһы дөрөҫ политика үткәрҙе. Сөнки уның аҡыл менән, алдан күреп эшләгән пландары булды. Шул пландарҙы ҡыйыу һәм эҙмә-эҙ рәүештә тормошҡа ашырҙы. Көстәрҙе дөрөҫ ойоштороп, социаль-демократтар партияһының һул ҡанатына булышлыҡ һәм ярҙам күрһәтте, уны рухландырҙы, революцион теория менән революцион практиканың айырылыуына юл ҡуйманы.

Унан ары Сакашич социал-демократтар партияһының эшмәкәрлеген тәнҡитләне. Ул эшселәр хәрәкәтен буржуаз йоғонтонан һәм формаль демократиянан ҡотҡарыу кәрәклеген, эшселәр синыфының берҙәмлегенең кәрәклеген һәм хыянатсыларға ҡаршы киҫкен көрәш кәрәклеген күрһәтте.

Пролетариат тик шул юл менән генә империализмға ҡаршы актив көрәш алып бара ала, социалистик үҫеш юлына аяҡ баҫа ала, тине Сакашич.

Сакашич, Советтар Союзының батыр армияһынан башҡа Европа халыҡтары ауыр коллоҡта яфаланырҙар ине, Совет Армияһы үҙенең Ватан һуғышында еңеүе менән генә сикләнмәне, бәлки Европаны тарихта быға сәтле күрелмәгән рәхимһеҙ тираниянан ҡотҡарҙы, тине.

Оратор артабан Англия лейбористәре Венгрияның уң социал-демократтары, атап әйткәндә, Пейер менән бәйләнеш урынлаштырҙылар, уларға булышлыҡ иттеләр, уларҙың агрессивлеген көсәйттеләр, тип билдәләне.

Венгрияның уң социал-демократтарының роле тураһында һөйләп, Сакашич, уларҙы хыянатсылар тип кенә баһаларға мөмкин тине. Улар Венгрия эшселәр хәрәкәтенә генә түгел, бәлки халыҡ-ара эшселәр хәрәкәтенә лә хыянат иттеләр, тине.

Унан һуң социал-демократтар партияһы эсендәге һулдар менән уңдар араһындағы киҫкен көрәшкә туҡталып, Сакашич, был көрәш уң хыянатсыларҙың һәм раскольниктарҙың тулы еңелеүе менән тамамланды, тип билдәләне. Ул яҡшы дуҫ һәм яҡшы иптәш Ракошиҙең был көрәштә ысын күңелдән булған намыҫлы һәм лойяль булышлығын һәм ярҙамын рәхмәт тойғоһо менән билдәләне. «Уның булышлығы һәм ярҙамы социал-демократик партияға берләшеү юлына аяҡ баҫырға, ҡыйралған, кәрәкмәгән армия рәүешендә түгел, ә тиң баһалы партнер булып берләшеү юлына аяҡ баҫырға мөмкинлек бирҙе».

Сакашич берләшеүҙең ысын туғанлыҡ рухында булғанлығын тағы бер ҡат билдәләй һәм, шуға күрә, был берләшеү ҡаҡшамаҫлыҡ һәм үҙгәрмәҫлек буласаҡ, ти.

Съездың иртәнге ултырышы шуның менән тамамланды. Киске ултырышта Ракоши һәм Сакашич докладтары буйынса фекер алышыуҙар башланды.

Австрия компартияһы Үҙәк Комитетенең пленумы

ВЕНА, 11 июнь. (ТАСС). Ошо көндәрҙә Австрия компартияһы Үҙәк Комитетенең пленумы булып үтте.

Парламент депутаты Фишер докладынан һәм уның буйынса булған сығыштарҙан һуң Үҙәк Комитет Австрия армияһы тураһындағы мәсьәлә буйынса резолюция ҡабул итте. Резолюцияла Үҙәк Комитет, халыҡтың көслө мохтажлығын иҫәпкә алып, коалицион партияларҙың армия төҙөү өсөн Австрия халҡынан средстволар йыйнау планына киҫкен рәүештә ҡаршы сыға.

Үҙәк Комитет Австрия өсөн өс йыллыҡ хужалыҡ планы ҡабул итте. Был план яҡын көндәрҙә иғлан ителәсәк. Партияның эске мәсьәләләре тураһындағы белдереүҙе компартия председателе Копленг яһаны.

Үҙәк Комитет партияның 14-се съезын октябрь аҙағында Венала саҡырыу тураһында ҡарар ҡабул итте.

Иран халҡының ауыр хәле

ТАВРИЗ, 11 июнь. (ТАСС). Провинциялағы матбуғат байтаҡ хәбәрҙәрендә, Иран халҡының сиктән тыш ауыр хәлен яҙа. Ҡоралланыуға һәм Американың хәрби советниктәрен ҡарауға тотолған бик ҙур расходтарға бәйләнешле рәүештә өҙлөкһөҙ үҫә барған эшһеҙлек, бөтә тауарҙың хаҡы күтәрелеү, массаларҙың хәйерселәнеүе илле һәр көн һайын бәлгеләккә төшерә һәм миллионлаған кешеләрҙе хәйерселеккә алып бара. «Тавриз» газетаһы «Артабан былай дауам итә алмай, сөнки хәйерселек һәм эшһеҙлек беҙҙең йәшәүебеҙгә ҡурҡыныс тыуҙыра»,— тигән мәҡәләһендә былай яҙа: «Иранда халыҡты талап күп байлыҡ йыйған бер-нисә мең спекулянт кенә үҙен яҡшы һиҙә. Улар хөкүмәттә яуаплы урындар биләп, үҙҙәренә мал йыйыу менән генә шөғөлләнәләр. Шул уҡ ваҡытта Ирандың һәр мөйөшөндә йөҙ меңләгән һәм миллионлаған кешеләрҙең үҙ балаларын ашатыу өсөн бер телем икмәктәре юҡ. Улар бөтәһе лә аҡрынлап үлеп бөтөүгә дусар ителгәндәр». Газета илдәрә итеүсе круттарҙы былай тип иҫкәртә: «Ике донъя һуғышын хәйерселек һәм кейемһеҙ хәлдә үткәргән иран халҡы хәҙер инде бынан 30 йыл элек булған кешеләр түгел».

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

АФИНЫ, 13 июнь. (ТАСС). 10 июнгә ҡаршы төндә грек партизандары Олимпаның көньяҡ итәгендә урынлашҡан Рапсани ҡалаһына һөжүм яһаны. Ҡалала милли гвардия ротаһы булған. Гарнизонға ярҙамға ебәрелгән король ғәскәрҙәре Рапсанигә килгәс, бер генә һалдатты тапҡандар. Ул мискә эсенә инеп йәшеренеп кенә иҫән тороп ҡалған.

Партизандар бер офицерҙы һәм 39 һалдатты пленға алдылар.

Киске газеталар, Рапсанигә һөжүм яһағандан һуң партизандар халыҡ йәшәй торған күп кенә пункттарҙы алдылар һәм түбәнге олимпаға контроль ҡуйҙылар, тип хәбәр итәләр. Афины газеталары был районда килеп тыуған хәлде ҡурҡыныслы тип күрһәтәләр.

Иерусалим фронтында Израиль ғәскәрҙәренең баш командующие үлтерелгән

НЬЮ-ЙОРК, 13 июнь. (ТАСС). Израиль государствоһы хөкүмәтенең Нью-Йорктағы вәкилдәре: 10 июндә Иерусалим фронтында Израиль ғәскәрҙәренең баш командующие полковник Давид Маркус һәләк булды, тип иғлан итте. Ул Иерусалимға аҙыҡ-түлек ташыу өсөн юлдар таҙартҡан ваҡытта үлтерелгән.

Палестиналағы хәлгә ҡарата

ЛОНДОН, 13 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Тель-Авивтан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Израиль государствоһы хөкүмәте кисә кис коммюнике иғлан иткән. Был коммюникела Палестиналағы һуғыш хәрәкәттәрен туҡтатыу тураһындағы килешеүҙең ғәрәптәр тарафынан боҙолоу ваҡиғалары тураһында әйтелә. Мәҫәлән, Сирия ғәскәрҙәре Хуле күленән көньяҡҡа табан Мишар-Хаярден секторында атакаларын дауам иткәндәр. Сирия самолеттары Үрге Галилейҙең көнсығыш секторында еврей ауылдарын бомбаға тотҡандар.

Эйнджев, Тивериад күленең көнсығыш ярында, шулай уҡ Афулла менән Тиберия араһында Седжерыға атакалар дауам иткән. Сирия пехотаһы бронемашиналар, орудиелар һәм самолеттар ярҙамында 12 июндә, урындағы ваҡыт менән 10 сәғәттә, Хуле күленән төньяҡҡа табан Кфар Сзольдкә көслө атака башлаған.

АҠШ-тың сенат комиссияһында

ВАШИНГТОН, 13 июнь. (ТАСС). Сенаттың ассигнованиелар комиссияһы «Маршалл планына» 4 миллиард доллар, йәғни вәкилдәр палатаһы тарафынан [illegible] [illegible] һумманы бүлеүҙе [illegible] [illegible] ҡаршы алды. Ләкин комиссия, был һумманы вәкилдәр палатаһындағыса 15 ай эсендә түгел, ә 12 ай эсендә тотонорға тәҡдим итергә тигән ҡарар ҡабул итте.

Фельетон урыны

Боҙолған кәйеф

Мәктәптә уҡыуҙар бөтөү менән, башланғыс мәктәпте тамамлаусы отличниктар, пионер отрядҙе йыйылышында республиканың башҡалаһына экскурсияға барыу тураһында һүҙ ҡуҙғаттылар. Икенсе көндә пионер вожатыйҙары мәктәп директорына инеп, отличниктарҙы Өфө ҡалаһына экскурсияға барыуын ойошҡан рәүештә үткәреү тураһында план төҙөнөләр. Бер нисә көндән һуң улар, уҡытыусы етәкселегендә, экскурсияға киттеләр.

Улар шат инеләр. Килгәндә вагонда йырлай-йырлай, юғары хыялдар менән ашҡынып килделәр. Өфө вокзалына килеп еткәс, шаулап торған музыка, йыр тауыштары уларҙа бигерәк тә ҙур пафос тыуҙырҙы.

Экскурсанттар ҙур ҡаланы, заводтарҙы, матур йорттарҙы, һоҡланғыс музейҙәрҙе күрҙеләр. Улар урамдан үтеүсе һәр бер кешегә ҙур мәхәббәт менән ҡаранылар. Портфелле кешеләрҙе күреп, ҙур урындарҙа хеҙмәт иткән ғалим, йәки яҙыусы, йәки профессор итеп ҡабул иттеләр.

Экскурсанттар ҙур гостиницала йоҡланылар. Һәнәүлы көндәрҙе берендә улар иртүк тороп, өлкә ойошмаларының биналарын тыштан ғына булһа ла ҡарарға киттеләр.

Улар урам буйынан учреждениеләрҙең вывескаларын уҡып килделәр. Күп вывескалар аңлашылманы, ләкин улар үҙҙәренең белемдәре аҙлығына һылтанылар уны.

Бына улар [illegible] [illegible] ВЛКСМ-дың Башҡортостан Өлкә комитетенең йорто. Вывеска. Уны экскурсанттар ҡат-ҡат уҡып сыҡтылар, ләкин:

— Был беҙ эҙләгән ВЛКСМ Башҡортостан Өлкә Комитеты [illegible] гел — тейештеләр. — Был [illegible] ҙер «ВЛКСМ-дың Башҡортостан ӨЛКЭ(?) комитеты». Быны [illegible] гән кешеләр үҙҙәренең [illegible] ниваларенең исемен [illegible] тейештәр, — тинеләр.

Улар баһалаша-баһалаша [illegible] нистрҙәр Советы йортона атланылар. Ҡаланың [illegible] ләре менән танышып булмаған [illegible] лар, Министрҙәр Советы [illegible] дағы тиҫтәләгән вывеска [illegible] уҡырға тотондолар.

Бына «Башҡорт АССР-ы [illegible] нистрҙәр Советы эргәһендә [illegible] зеү(?) материалдары промышленносе управлениеһе», «СССР [illegible] мате(?) эргәһендәге колхоз [illegible] Советенең Башҡорт АССР-[illegible] ғы Вәкиле», «Башҡорт АССР [illegible] енсл(?) промышленность [illegible] терствоһы», «Башҡортостан [illegible] минсрәр(?) Советы эргәһендәге физкультура һәм спорт [illegible] һәм башҡалар...

Эләнгән вывескаларҙа [illegible] бер нәмә лә аңламаныҡ, [illegible] уҡытыусыға мөрәжәғәт [illegible] Уҡытыусы вывескаларҙы [illegible] сыҡты ла, аңлашыр [illegible] күреп, нәмә әйтергә лә [illegible] аптырап, оялып ҡалды.

Уҡытыусының уңайһыҙ [illegible] ҡалыуын күреп, балаларҙың [illegible] кәйефтәре боҙолдо. Араларынан [illegible] реһе:

— Апа, — тине уҡытыусы [illegible] бында эшләгән кешеләрҙе [illegible] ҡорт телендә яҙырға беҙ [illegible] алыр инек микән?..

Нимәләр бөтә экскурсанттарҙың кәйефе боҙолдо һәм һорауға [illegible] биреүсе булманы.

Рахман [illegible]

Трамвай вагондарын һәм юлдарын ремонтлау

Өфө ҡала тимер юлының трамвай паркы коллективе эксплоатациянан сығарылған вагондарҙы яңынан файҙаланыу өҫтөндә эшләй. Биш ай эсендә моторлы дүрт һәм тағылма 6 вагон ремонттан сығарылды. Хәҙер парктың ремонт мастерскойында ике вагонға ремонт уҙғарыла. Быйыл [illegible] торлы 9 вагонға ремонт [illegible] эксплоатацияға тапшырыла[illegible]

Юл бүлеге эшселәре [illegible] тимер юлдарына [illegible] ағымдағы ремонт эштәре [illegible] баралар. Бер нисә километр [illegible] ремонт уҙғарылды ла инде.

Нефтселәр өсөн дөйөм торлаҡ

Ленин орденле «Туймазынефть» тресы төҙөүселәрҙән яңы ҙур дөйөм торлаҡ бинаһы ҡабул итеп алып, эксплоатацияға тапшырҙы. Бында нефтселәрҙән 100-ҙән артыҡ яңғыҙ эшсе урынлаштырылды.

Дөйөм торлаҡ яҡшы [illegible] дырылған, бында эш [illegible] тереү, тороусыларҙың [illegible] һаҡлау бүлмәләре һәм [illegible] ҙамсы бүлмәләр бар.

БЕЛДЕРЕҮ

Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз общестноһының Башҡортостан бүлеге Бөтә Союз общестноһы действительный члендәренең фәндең төрлө тармаҡтары буйынса ябыҡ һәм публичный лекцияларына республиканың бөтә учреждениеләренән, предприятиеләренән һәм общественный ойошмаларынан заявкалар ҡабул итә, шулай уҡ айырым ойошмаларҙан лекциялары [illegible] лектив барыу өсөн дә заявка [illegible] бул ителә.

Общестноның бүлеге [illegible] йортона урынлашҡан. Адрес [illegible] ҡалаһы, Карл Маркс урамы, [illegible] номерле йорт, телефон [illegible] 2—63—04. Оргкомитет [illegible]

Яуаплы редактор: Г. Б. ГУЗАИРОВ

«Россовхозтранс»тың Өфө ҡалаһындағы автобазаһына, яңы машиналарҙа эшләү өсөн, ашығыс рәүештә шоферҙар талап ителә.

Шоферҙар, эш хаҡы түләүҙән тыш, бойҙай, картуф, йә[illegible] шелсә һәм башҡа продукттар менән тәьмин ителәләр.

Мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, [illegible] урамы, 60-сы номерле йорт.

«Россовхозтранс»

Страховать итергә онотмағыҙ!

Госстрах агенттарен өйөгөҙгә саҡырығыҙ!

Редакция адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—[illegible] промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00782. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тираж [illegible]

БӨТӘ ИЛДӘРҘӘҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 120 18 июнь йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Шверниктың Чехословакия республикаһы президенте Готвальд әфәндегә телеграммаһы. (1-се бит).

И. В. Сталиндең һәм В. М. Молотовтың Чехословакия республикаһы президенте Готвальд әфәндегә телеграмма. (1-се бит).

Чехословакия республикаһы президенте Готвальд әфәндеһенән СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. Шверникҡа телеграмма. (1-се бит).

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы. 15 июндә иртәнге һәм киске ултырыштар. (1-се бит).

16 июндәге иртәнге ултырыш. (1—3-сө биттәр).

Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджеты һәм БАССР-ҙың 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында Башҡорт АССР-ы финанс Министры иптәш С. Ф. Вәлиевтең докламы. (2—3-сө биттәр).

16 июндәге киске ултырыш. (3-сө бит).

Бөйөк революцион яҙыусы А. М. Горькийҙың үлеүенә 12 йыл. (3-сө бит).

Пар һөрөү планын тиҙерәк үтәргә! (4-се бит).

Ғ. Әхмәтшин.—Трасса буйлап. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Башҡорт АССР-ҙың государство бюджете

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы 1947 йылда Башҡортостан государство бюджетенең үтәлешен һәм 1948 йыл өсөн билдәләнгән бюджетте тикшерҙе.

Республикабыҙҙың халыҡ хужалығы уҙған йылда байтаҡ уңыштарға ирешкте. Промышленность һәм шулай уҡ ауыл хужалығы буйынса государство планы уңышлы үтәлде. Был 1947 йылда Башҡорт АССР-ы государство бюджетен доход буйынса 100,5 һәм расход буйынса 97,3 процентҡа үтәүгә мөмкинлек бирҙе.

Государство бюджете үтәлеше өлкәһендә өлгәшелгән уңыштар социалистик системала булған хужалыҡтың ҡеүәтен һәм һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көрәштә республикабыҙ халҡының ҙур тырышлыҡ күрһәтеүен бик асыҡ сағылдыра.

Совет государство бюджетенең уңышлы рәүештә үтәлеүе илебеҙҙең экономикаһын артабан нығытыу менән бергә, уның культураһын тағы ла сәскә аттырыуға тулы мөмкинлектәрҙе аса. Шуға күрә лә совет кешеләре государство бюджетен аныҡ итеп үтәү өсөн бөтә көстәрен һәм ижади хеҙмәттәрен һалалар. Һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү өсөн бөтә халыҡ көрәшенең көндән-көн киң ҡолас менән йәйелә барыуы быны бик асыҡ дәрәсләй.

Башҡорт АССР-ының 1948 йылға билдәләнгән бюджетендә 876 миллион 124 мең һум доход һәм шул уҡ күләмдә расход күҙҙә тотола, йәки үткән йылғыға сағыштырғанда доход 4,8 һәм расход 10,3 процентҡа артыҡ планлаштырыла. Шул иҫәптән, социаль-культура эштәренә 689.140 мең һум йәки үткән йылғыға ҡарағанда 77.050 мең һум артыҡ ҡарала. Билдәләнгән был сараларҙа партия һәм Совет Хөкүмәтенең халыҡ мәғарифенә ҙур әһәмиәт итеүҙәре һәм халыҡтың көн-күрешен артабан яҡшыртыуҙа даими хәстәрлектәре бик асыҡ күренә.

Ләкин был сараларҙы уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыу өсөн билдәләнгән бюджетте тағы ла аныҡ итеп үтәү талап ителә.

Государство бюджетен аныҡ рәүештә үтәү халыҡ хужалығы төҙәлешен үҙ ваҡытында финансировать итеүгә һәм ошо нигеҙҙә сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө йылы программаһын уңышлыраҡ тамамлауға ҙур мөмкинлектәр бирә. Предприятиеларҙа хужалыҡ иҫәбен нығытыу, сырьё һәм материалдарҙы, яғыулыҡ һәм электр энергияһын һаҡлыҡ менән тотоноу, ауыл хужалығында мул уңыш үҫтереү, мал һанын арттырыу һәм ярҙамсы хужалыҡтарҙы киңәйтә барыу — бюджет үтәлеше өлкәһендә государство әһәмиәтендәге нигеҙ саралар булып торалар. Партия һәм хөкүмәт тарафынан ҡуйылған был мөһим бурыстарҙы аңлаған хужалыҡ етәкселәре үҙҙәренең практик эштәрен ошо нигеҙҙә алып баралар.

Мәҫәлән, Башмельтрест үткән йыл государствонан 857 мең һум дотация алғайны, быйыл эске резервтарҙы тулыһынса файҙаланыуы арҡаһында дотацияһыҙ эшләү генә түгел, бәлки, 4 ай эсендә 136 мең һум пландан тыш накопление бирҙе. Беренсе номерлы кирбес заводы продукцияның үҙенә төшөү хаҡын, үткән йылғыға сағыштырғанда, байтаҡ кәметеп, ҙур доход алыуға өлгәште.

Ләкин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республикабыҙҙа хужалыҡ резервтарын тулы файҙаланып рентабелле эшләүгә бөтә мөмкинлектәр була тороп та, государство иҫәбендә генә йәшәргә ынтылыусы предприятие етәкселәре лә юҡ түгел. Хәҙер бурыс бындай зарарлы ҡараштарға ҡаршы ҡаты көрәш алып барыуҙан тора. Сессияла делегаттар государство бюджетен үтәү өсөн ысын көрәш ойоштормаған етәкселәрҙе ҡаты тәнҡитләнеләр һәм уларға хаталарҙы ашығыс төҙәтеү юлдарын күрһәттеләр.

Государство бюджетен үтәү өсөн көрәш һәм бюджет сметалары буйынса ҡаралған аҡсаларҙы үҙ урындарына файҙаланыу — хужалыҡ, финанс һәм сауҙа ойошмаларының, шулай уҡ бөтә совет органдары етәкселәренең изге бурысы. Сөнки халыҡ мәғарифен, дауалау йорттарын, культура-ағартыу учреждениеларын һәм башҡа халыҡ төҙөлештәрен нормаль рәүештә финансировать итеү — государство бюджетенең уңышлы үтәлешенә бәйләнгән.

Шик юҡ, илебеҙҙе еңеүҙәрҙән еңеүҙәргә алып барыусы бөйөк партиябыҙҙың аҡыллы етәкселегендә Башҡортостан республикаһы 1948 йылдың бюджетен дә уңышлы рәүештә үтәр.

—★—

Чехословакия республикаһының президенте Клемент Готвальд әфәндегә

Прага

Һеҙҙе Чехословакия республикаһының президенте итеп һайлау уңайы менән, президент әфәнде, һеҙҙең минән ысын йөрәктән булған котлауымды ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Н. Шверник.

Чехословакия республикаһының президенте Готвальд әфәндегә

Прага

Халыҡ демократияһының еңеүе һәм һеҙҙе Чехословакия республикаһының президенте итеп һайлау айҡанлы беҙҙән ысын йөрәктән булған котлауыбыҙҙы ҡабул итегеҙ.

И. Сталин.
В. Молотов.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИККӘ

Миңә Чехословакия республикаһының президенте итеп һайлау айҡанлы ебәргән һәм ысын күңелдән булған котлауығыҙ өсөн, председатель әфәнде минән рәхмәтемде ҡабул итеүегеҙҙе һорайым.

Клемент Готвальд.

СССР Министрҙар Советы Председателе И. СТАЛИНҒА
СССР Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары В. МОЛОТОВҠА

Чехословакияла халыҡ демократияһының еңеүе менән һәм миңә Чехословакия республикаһының президенте итеп һайлау уңайы менән котлауығыҙ өсөн һеҙгә ысын күңелдән рәхмәт әйтәм. Чехословакияла халыҡ демократияһының көсәйеүе шулай уҡ Чехословакия менән Советтар Союзы араһындағы туғанлыҡ союзының артабан нығыуын аңлата.

Клемент Готвальд.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы

15 июндә иртәнге ултырыш

Депутат иптәш Уразбаевтың Башҡорт АССР-ы Советтәренең ойоштороу-массовый эшенең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһындағы докладлы буйынса прениела беренсе булып депутат **З. М. Морзаханов** (Стәрлетамаҡ) сығыш яһай.

— Урындағы Советтәр, — ти иптәш Морзаханов, — халыҡ массалары менән тығыҙ бәйләнештә булғанда ғына эшкә һәләтле була алалар. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Стәрлетамаҡ ҡала Советы һуңғы ваҡыттарҙа ойоштороу-массовый эштәрҙең яҡшырыуына өлгәште.

Мәҫәлән, һаулыҡ һаҡлау буйынса даими комиссия яҡшы эшләй. Ул дауалау учреждениеларенең эштәрендәге ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе асты һәм был комиссия ул етешһеҙлектәрҙе йылдам бөтөрөүгә өлгәште.

Депутаттар мәктәп эштәрен яҡшыртыу буйынса ҙур ғына эштәр алып баралар. Уларҙың ярҙамы арҡаһында Стәрлетамаҡ ҡалаһы мәктәптәрҙе яңы уҡыу йылына әҙерләүҙә 5 йыл инде беренсе урынды алып килә.

Ҡырмыҫҡалы район Советы исполкомы председателе депутат **Г. Г. Рафиков** үҙенең сығышында докладсының ҡайһы бер урындағы Советтәрҙә, шул иҫәптән Ҡырмыҫҡалы район Советенең эшендәге етешһеҙлектәрҙе дөрөҫ тәнҡитләгәнен әйтте.

— Беҙҙең районда етешһеҙлектәр күп, — ти ул, — шулай ҙа һайлауҙарҙан һуң Советтәрҙең эштәре бер ни тиклем яҡшырҙы тип әйтергә кәрәк. Район һәм ауыл Советтәре колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яҡтан нығытыу мәсьәләләре менән күберәк шөғөлләнә башланылар. Һөҙөмтәлә Ҡырмыҫҡалы районының колхоздары һәм совхоздары сәсеү планын арттырып үтәнеләр. Район Советенең халыҡ мәғарифе, һаулыҡ һаҡлау, ауыл хужалығы даими комиссиялары үҙҙәренең эштәрен план буйынса алып баралар.

Борай район Советы исполкомының председателе **И. З. Закиров** урындағы Совет исполкомдарының эшендә яҡшы үҙгәрештәр булыуы тураһында асыҡ миҫалдар менән һөйләй. Ауыл Советтәренең күбеһе сессия ултырыштарын Конституция менән билдәләнгән срокта үткәрә.

— Иптәш Уразбаевтың докладынан беҙҙең республикабыҙҙа хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәре ҙур эштәр башҡарғанлыҡтары күренә, — ти Благовар район Советы исполкомы председателе **М. М. Абдекаев**. — Благовар район Советы ла үҙенең эшен ауыл хужалығының артабан күтәрелешенә ирешеү юнәлешендә алып бара.

Район Советы исполкомы хеҙмәтсәндәрҙе политик-тәрбиәләү мәсьәләһенә етди иғтибар бирә. Ағымдағы йылда клубтарҙы һәм уҡыу йорттарын аяҡҡа баҫтырыу буйынса байтаҡ саралар билдәләнде. Район үҙәгендә 32 кешенән торған лекторҙар группаһы эшләп килә. Политик һәм фәнни-ағартыу темаларына байтаҡ лекциялар уҡылды һәм беседалар үҙғарылды. Ләкин беҙгә өлкә ойошмаларынан ҙур ярҙам талап ителгәнен әйтергә кәрәк. Бигерәк тә даими комиссиялар өсөн инструктив материалдар етешмәй, был турала положение баҫып сығарыу тураһында һүҙ күптән бара. Ләкин ул һаман да баҫылмай.

— Район Советы эргәһендә, — ти Яңауыл район Советы исполкомы председателе депутат **Х. Я. Кәримов**, — 8 ауыл Советтәре эргәһендә 121 даими комиссиялар ойошторолдо. Уларҙың һәр ҡайһыһы эш планы төҙөп ултырыштарҙы регуляр рәүештә үткәрә. Даими комиссиялар район Советы исполкомы менән тығыҙ бәйләнештә эшләйҙәр, айырым мәсьәләләрҙе өйрәнәләр һәм исполком ултырыштарында докладтар менән сығыш яһайҙар.

Ойоштороу-массовый эштәрҙе дөрөҫ ҡуйыуҙың һөҙөмтәһе күҙ алдында. Район аҡса туплау планын кварталдан-кварталға арттырып үтәп килә. Сәсеү майҙанын 82 мең гектарға еткерел, һуғышҡа тиклемге кимәлгә өлгәштек.

Урындағы Советтәр район үҙәген һәм ауылдарҙы төҙөкләндереү буйынса ҙур эштәр башҡарҙылар. 16 мең төптән артығыраҡ ағас ултыртылды. Яңы йорттар төҙөлә, Ватан һуғышында һәләк булған воиндар семьяларының йорттарына ремонт үткәрелә. Юл төҙөү эштәре уңышлы бара. Байтаҡ ауыл Советтәрендә культура-ағартыу эштәрен яҡшыртыу буйынса ҙур ғына уңыштарға өлгәшелде.

Черниковск ҡала Советы исполкомы председателе **И. В. Крюков** ағымдағы йылда промышленность предприятиеларенең үҙҙәренең эштәрен байтаҡ яҡшыртыуҙары тураһында һөйләне.

— Ҡала Советенең бурысы, — ти иптәш Крюков, — һайлаусыларҙың ҡала Советенең эшен яҡшыртыуға, хеҙмәтсәндәрҙең культура һәм көн-күрештәрен тәьмин итеүгә йүнәлдерелгән наказдарын намыҫлы рәүештә үтәүҙән тора.

Һайлауҙар осоронда бөтә участкаларҙан да һайлаусыларҙың наказдарын йыйнап, уларҙан дөйөмләштерелгән документ төҙөнөк. Ул документта торлаҡ, кино-театр, трамвай, мәктәп, водопровод төҙөү һәм башҡа мәсьәләләр инделелде. Был документ ҡала Советенең практик эше өсөн программа булып тора.

Даими комиссиялар ҙур эшмәкәрлек күрһәтәләр, депутаттар һайлаусылар менән йыш ҡына осрашалар. Был, ҡала Советенең эшендә уңышлы һөҙөмтәләр бирә.

Иптәш Крюков өлкә газеталарының алдына урындағы Советтәрҙең эштәрен яҡшыраҡ яҡтыртыу һәм уларҙың эш тәжрибәләрен биреү, булған етешһеҙлектәрҙе асыу мәсьәләләрен ҡуя. — Был, ҡала һәм район Советтәре исполкомдарының эштәрен артабан яҡшыртыуға ныҡ ярҙам итер,— ти ул.

Бынан һуң иртәнге ултырыш ябыла.

Һүрәттә: Башҡорт АССР-ы Верховный Советы депутаттары — (һулдан уңға) — Һ. Е. Заманова (Талдаш һайлау округы), Ф. М. Носкова (Преображенск һайлау округы) һәм Г. Х. Юсупова (Мерсеев һайлау округы).
М. Әхмәтшинов фотоһы.

15 июндә киске ултырыш

Председателлек итеүсе депутат Ҡадиров БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениелары эштәре Управлениеһының начальнигы **М. З. Нәзировҡа** һүҙ бирә.

— Коммунизм төҙөү эшенең уңышы, — ти иптәш Нәзиров, — массаларҙың социалистик аңлылыҡ дәрәжәһенә бәйләнгән. Бына шуның өсөн дә идеологик тәрбиә мәсьәләләре беренсе дәрәжәлеге әһәмиәтте ҡаҙаналар. Идеологик эштәрҙе йәйелдереүҙә республикабыҙҙағы культура-ағартыу учреждениелары ҙур роль уйнарға тейештәр.

Беҙҙә яҡшы эшләүсе библиотекалар, клубтар бар. Ләкин, Башҡортостандағы культура-ағартыу учреждениеларының эштәрендәге тарҡаулыҡтың әле һаман да бөтөрелмәгәнлеген әйтергә кәрәк. Күйөргәҙе, Ҡалтасы, Ауырғазы, Зианчура райондарында был учреждениелар ҡәнәғәтләнмәҫлек хәлдә торалар. Һәм был эштә ғәйептең ҙур өлөшө урындағы Советтәргә төшә, улар күп ваҡыттарҙа библиотекаларға, клубтарға ярҙам күрһәтмәйҙәр.

— Колхоз ауылында хәҙер рухани үҫештең ҙур процесы бара,— ти иптәш Нәзиров һүҙҙе тамамлап. — Беҙҙең бурыс — колхоз крәҫтиәндәренең белемгә, культураға булған ынтылышын тәьмин итеү.

Федоровка район Советы исполкомы председателе **И. А. Ефремов**, артта ҡалыусы Федоровка районы өлкә ойошмалар тарафынан кәрәкле ярҙамды ала алмай, тип билдәләй. Районға күп вәғәҙә итәләр, ләкин хужалыҡты нығытыу өсөн бер нәмә лә бирмәйҙәр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе урынбаҫары депутат **И. Б. Долганов** үҙ сығышында урындағы Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәрендәге етешһеҙлектәргә туҡталды.

— Депутаттарҙың Советтәре,— тине иптәш Долганов, — хеҙмәтсәндәрҙең ҡеүәтле ярҙамы менән файҙаланалар. Ләкин Советтәр үҙҙәренең эштәрендә массаларға ныҡлы таянмайҙар, уларҙан айырылалар. Быны һайлаусыларҙың наказдарын онотоу, сессияларҙы регуляр саҡырмау асыҡ күрһәтә. Мәҫәлән, Салауат районында 1948 йылда район Советенең бер генә сессияһы саҡырылған. Матрай, Воскресен, Зианчура райондарында ауыл Советтәренең сессиялары регуляр рәүештә үткәрелмәйҙәр.

Иптәш Долганов үҙ сығышын тамамлап, урындағы Советтәр Ленин—Сталин партияһының күрһәтмәләрен үтәй барып, массаларҙың үҫә барған активлегенә етәкселек итерҙәр һәм уны социалистик төҙөлештең артабанғы уңыштары өсөн кәрәкле юнәлдерерҙәр, тип ышаныс белдерҙе.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателе урынбаҫары депутат **В. Ғ. Әхмәров** үҙ сығышында урындағы Советтәрҙең мөһим бурыстарының береһенә — хеҙмәтсәндәрҙең көн-күреше кимәлен артабан күтәреү өсөн кәрәкле мәсьәләһенә туҡталды.

— Партия һәм хөкүмәт, — тине ул, — был мәсьәләләргә ҙур иғтибар бүләләр. Шуға ҡарамаҫтан урындағы Советтәр был эшкә насар етәкселек итәләр. Ҡала һәм район Советтәре исполкомдары тарафынан практик етәкселектең һәм государство контроленең булмауы шуға килтерә, — республикала торлаҡ һәм промышленность төҙөлеше планының үтәлеше һис ҡәнәғәтләнерлек түгел. Был Өфө, Белорет, Черниковск, Ишембай, Октябрьск ҡалаларына ҡарата әйтелә. Төҙөлөш эштәренең сифаты ла түбән.

Беҙҙең республикабыҙҙа шулай уҡ ҙур коммуналь төҙөлештәр үткәрелә. Был өлкәлә лә урындағы Советтәр етерлек тиклем ныҡлы тырышлыҡ һәм энергиялылыҡ күрһәтмәйҙәр. Коммуналь торлаҡ фондтарына капиталь һәм ағымдағы ремонт өсөн ебәрелгән средстволар йыш ҡына файҙаланылмай ҡалдырылалар. Беҙҙең ҡалаларыбыҙҙың һәм райондарыбыҙҙың коммуналь предприятиелары хеҙмәтсәндәр тарафынан ҡуйылған һорауҙарҙы тәьмин итеүҙә бик артта ҡалалар. Урындағы Советтәр, үҙ эштәрен ҡайтанан ҡороп, был артта ҡалған участкаға айырыуса иғтибар бүлергә тейештәр.

Ҡала, район үҙәктәрен һәм ауылдарҙы төҙөкләндереү урындағы Советтәрҙең мөһим бурыстары булып тора. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был өлкәлә бик аҙ эшләнгән әле. Бигерәк тә район үҙәктәрен төҙөкләндереү эше артта ҡала. Маҡар, Стәрлебаш райондарындағы кеүек, район үҙәктәре ташландыҡ хәлендә торалар. Бында хеҙмәтсәндәрҙең эштә ҡатнашыуҙары ҙур ярҙам итә ала. Төҙөкләндереү эшенә хеҙмәтсәндәрҙе ылыҡтырыу — урындағы Советтәрҙең эше.

Доклад буйынса сығыштар ошоноң менән тамамлана.

Сессия Советтәрҙең ойоштороу-массовый эштәренең торошо һәм уны яҡшыртыу саралары тураһында ҡарар ҡабул итә.

15 июндәге киске ултырышта көн тәртибендәге икенсе мәсьәлә буйынса: «Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджетен һәм Башҡорт АССР-ының 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһындағы отчетты раҫлау» хаҡында Башҡорт АССР-ы финанс министре **С. Ф. Вәлиевтең** докладын тыңланды. Был мәсьәлә буйынса бюджет комиссияһы председателе депутат **М. Г. Вальшин** ҡушма доклад менән сығыш яһаны.

Унан һуң 16 июндең 11 сәғәтенә тиклем тәнәфес иғлан ителде.

16 июндә иртәнге ултырыш

16 июнда иртәнге сәғәт 11-ҙә БАССР Верховный Советенең өсөнсө ултырышы башланды.

Көн тәртибе буйынса Башҡорт АССР-ы финанс Министре иптәш Вәлиевтең Башҡорт АССР-ының 1948 йылғы бюджете Башҡорт АССР-ының 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында отчет докладын тикшерелде.

Прениела беренсе булып Стәрлетамаҡ ҡала Советенең председателе **Г. А. Балезин** сығыш яһай. Ул промышленность һәм культура үҫешендә Стәрлетамаҡ хеҙмәтсәндәренең өлгәшкән уңыштары тураһында һөйләй.

— Шул уҡ ваҡытта, — тип һүҙен дауам итә иптәш Балезин, — коммуналь хужалыҡ һәм торлаҡ төҙөлештәре халыҡтың үҫә барған талабынан артҡа ҡала.

Иглин район Советы исполкомы председателе депутат **Д. М. Каракаев** үҙенең сығышында райондың мәктәптәрен һәм дауалау учреждениеларын ҡышҡа әҙерләү, күперҙәрҙе ремонтлау һәм яңынан төҙөү мәсьәләләренә туҡтала. Ул, был ихтыяждар өсөн Иглин районы бюджетенең расход өлөшөн 200 мең һумға арттырыуҙы һорай.

— Бүздәк районы, — ти Бүздәк һайлау округынан депутаты **Г. И. Хәкимова**, — республикала ҙур райондарҙың береһе. Ләкин район үҙәге төҙөкләндерелмәгән, электростанция юҡ. Район үҙәген төҙөкләндереү өсөн ағымдағы йылдың бюджетендә 120 мең һум билдәләнгән, ләкин ул сумма етерлек түгел.

Башпотребсоюз правлениеһы председателе **М. А. Динмөхәмәтов** район потребсоюздарының тауар әйләнешен арттырыу, ауыл хужалығы продукцияларын һәм сырьё һатып алыуҙы көсәйтеү, үҙ предприятиеларында киң ҡулланыу тауарҙарын етештереүҙе киңәйтеү өлкәһендәге эштәре тураһында һөйләй.

— Ләкин был әле, — ти иптәш Динмөхәмәтов, — ауыл һәм ҡала хеҙмәтсәндәренең талаптарын ҡәнәғәтләндерә алмай. Потребкооперациялар насар эшләйҙәр, үлсәүҙә алдау, урлашыу, әрәм-шәрәм итеү ваҡиғалары ла бар. Сауҙа эшен артабан яҡшыртыу өлкәһендә урындағы Советтәрҙең кооперациялар өҫтөнән оператив етәкселек һәм практик ярҙам итеүҙәре талап ителә.

(Дауамы 3-сө биттә).

Башкорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы

Башкорт АССР-ның 1948 йылға бюджете һәм БАССР-ҙың 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында

*Башкорт АССР-ы финанс Министре иптәш С. Ф. Вәлиевтең доклады**

Депутат иптәштәр!

Уҙған 1947 йыл илебеҙҙә бик ҙур политик һәм хеҙмәт күтәренлеге шарттарында үтте һәм СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллығын үтәү өсөн көрәштә яңы ҙур еңеүҙәр менән билдәләнде.

Совет халҡы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү бурысын ҡуйҙы һәм Ленин — Сталин партияһы етәкселегендә был бөйөк һәм изге маҡсатҡа ирешеү юлында бик ҙур уңыштарға өлгәште лә инде.

Биш йыллыҡ планды уңышлы үтәй барып, партия һәм Совет Хөкүмәте 1947 йылдың аҙағында аҡса реформаһы үткәрҙеләр һәм аҙыҡ-түлек, промышленность тауарҙарына карточкаларҙы бөтөрҙөләр. Был сара политик һәм экономик яҡтан бик ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Ул Совет государствоһының экономикаһын артабан нығытыуға һәм илебеҙ халыҡтарының культура һәм материаль тормош кимәлен күтәреүгә йүнәлдерелгән.

Республикабыҙҙың хеҙмәтсәндәре, бөйөк Советтәр Союзының башҡа туғандаш халыҡтары менән берлектә, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ тарафынан ҡуйылған бурыстарҙы үтәүҙә серьеҙ уңыштарға өлгәштеләр. Башҡорт АССР-ына ҡараған промышленность 1947 йылдың бурыстарын уңышлы рәүештә башҡарҙы һәм валовой продукция етештереү планын 103,7 процентҡа үтәне.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумының «Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһындағы» тарихи ҡарарын үтәй барып, Башҡорт республикаһы ауыл хужалығы өлкәһендә лә артабанғы уңыштарға өлгәште. Республиканың колхоздары һәм совхоздары 1947 йылда юғары урожай үҫтереп алдылар һәм иген әҙерләү буйынса государство планын арттырып үтәнеләр. Республикабыҙ хужалығында өлгәшелгән уңыштар 1947 йылдың бюджетен үтәүгә яҡшы йоғонто яһаны һәм бюджеттең артабан үҫеше өсөн нигеҙлек тыуҙырҙы.

Министрҙар Советы тарафынан Башҡорт АССР-ы Верховный Советының ошо сессияһы ҡарауына һәм раҫлауына индерелгән 1948 йылға бюджет проекты сталинсе яңы биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылының халыҡ хужалығы планына тулыһынса ярашлы рәүештә төҙөлгән һәм республикабыҙҙың хужалығын һәм культураһын артабан күтәреүгә йүнәлдерелгән.

Башкорт АССР-ының 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше

Башҡорт АССР-ының 1947 йылғы бюджете регулировать итеү һәм үҙ-ара иҫәптәр фондтарынан башҡа доходтар буйынса 835.720 мең һум суммала, йәки 100,5 процентҡа һәм расходтар буйынса — 794.523 мең һум суммала, йәки 97,3 процентҡа үтәлде. Был, доходтар расходтарға ҡарағанда 45.107 мең һум суммала арттырып үтәлгән тигән һүҙ.

Еңел һәм ит-һөт промышленносе табыштарынан отчисленнелар, промысловый һәм потребитель кооперацияһынан доход налогы, халыҡтан доход буйынса алына торған налогтан отчисленнелар, государство заемдарынан һәм урындағы башҡа налогтарҙан һәм йыйымдарҙан отчисленнелар бюджетҡа артығы менән инде.

Тәмле аҙыҡ промышленносе, автотранспорт управлениеһе предприятиелары, кинофикация Управленеһе предприятиелары, Ауыл хужалығы Министерствоһының хужалыҡ органдары, коммуналь предприятиелар һәм урындағы хужалыҡтың ҡайһы бер башҡа тармаҡтары бюджет алдындағы йөкләмәләрен үтәмәнеләр. Обороттан алына торған налог буйынса ла бюджетҡа байтаҡ сумма инеп бөтмәне.

Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә 94.239 мең һум, социаль-культура сараларына — 612.090 мең һум, идара итеү аппаратын тотоуға — 77.426 мең һум һәм башҡа расходтарға 10.768 мең һум бүленде.

1947 йылда халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарына һәм социаль-культура сараларына бюджеттән, 1946 йылғыға сағыштырғанда, 185.195 мең һум средство артыҡ һалынды.

Башкорт АССР-ының 1948 йылға бюджете

Аҡса реформаһы һөҙөмтәләрен нығытыу бурыстарынан сығып Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы бюджетте төҙөгән саҡта урындағы доходтарҙы максималь рәүештә ылыҡтырыуҙы, хужалыҡтағы резервтәрҙе тулыһынса файҙаланыуҙы, государство средстволарын экономиялы тотоноуҙы һәм халыҡ хужалығының бөтә тармаҡтарында хужалыҡ иҫәбен индереүҙе һәм нығытыуҙы төп бурыс итеп ҡуйҙы.

Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджетенең күләме доходтар һәм расходтар буйынса 876.124 мең һум суммала йәғни уҙған йылға сағыштырғанда доходтар буйынса 4,8 процентҡа һәм расходтар буйынса — 10,3 процентҡа арттырып билдәләнде. Бынан башҡа, 1949 йылдың 1 ғинуарына оборотта йөрөтәлә торған аҡса 32.920 мең һум суммала күҙҙә тотола.

Бюджеткә социалистик хужалыктан инә торған средстволар

Республика бюджетенең бөтә доходтарының яртыһы самаһын, йәғни 396.782 мең һумын социалистик хужалыҡтан инә торған доходтар тәшкил итә. Производство пландарын үтәү, тауарҙар һатыу пландарын үтәү, һәр бер предприятие буйынса айырым рәүештә продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү был средстволарҙың тулыһынса инеүенең хәл иткес шарты булып тора.

Обороттан алына торған налог төп доход сығанағы булып тора. Ләкин, уҙған йылғы эштәрҙең йомғаҡтары хужалыҡ ойошмаларының ҡайһы бер етәкселәренең производство пландарын һәм тауар әйләнеше пландарын үтәү өсөн сиктән тыш йомшаҡ көрәшкәнлектәрен күрһәтәләр.

Уҙған йыл Главособунивермаг магазиндәре тауар әйләнеше планын 81,4 процентҡа һәм Главособгастроном магазиндәре—90,7 процентҡа үтәнеләр, шуның һөҙөмтәһендә был ике система буйынса обороттан алына торған налог — 43,3 миллион һум инеп етмәне. БАССР Аҙыҡ промышленносе Министерствоһының Өфөләге һыра заводы һәм райпищепромкомбинаттар производство пландарын кварталдан кварталға үтәмәнеләр. Шуның арҡаһында улар обороттан алына торған налогтан 8,8 миллион һум бирел еткермәнеләр. Май эшкәртеү промышленносе предприятиелары бюджет алдындағы йөкләмәләрен бөтөнләй ҡәнәғәтләнмәслек рәүештә үтәнеләр. Улар обороттан алына торған налогтан 14 миллион һум сумманы бирел еткермәнеләр.

Бюджетте уңышлы үтәү өсөн финанс органдары работниктәренең государство доходтарын иҫәпләп сығарыу һәм алыу эшендә нығлы тәртип урынлаштырыуҙары талап ителә.

План буйынса 1948 йылға республиканың государство предприятиелары һәм ойошмалары буйынса накоплениеларҙың дөйөм суммаһы 47.874 мең һум суммала билдәләнә. Шуларҙан 38.362 мең һумы бюджетҡа индерелергә тейешле. 1947 йылда производство пландарын арттырып үтәү һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү һөҙөмтәһендә республиканың государство предприятиелары һәм кооператив ойошмалары пландан тыш 13 миллион һум накопление алдылар.

Сырьены, материалдарҙы, яғыулыҡты, электр энергияһын һаҡлыҡ менән һәм экономиялы тотоноу, накладной расходтарҙы кәметеү өсөн киҫкен көрәш һәм хужаһыҙлыҡты бөтөрөү яңы хужалыҡ шарттарында бик мөһим государство бурысы булып тора. Ләкин предприятиеларҙың һәм хужалыҡ ойошмаларының айырым етәкселәре пландан тыш бик ҙур накладной расходтар яһауға юл ҡуялар.

Мәҫәлән, еңел промышленность Министерствоһының Өфөләге 8 март исемендәге тегеү фабрикаһы (директоры иптәш Сиразиев) сметала ҡаралған дөйөм завод расходтарын артыҡ тотоноу һәм башҡа файҙаһыҙ расходтарҙы списать итеү иҫәбенә продукцияның үҙенә төшөү хаҡын күтәреү һөҙөмтәһендә генә 1947 йылда 600 мең һум юғалтты; Ворошилов исемендәге фабрика 155 мең һум тик штрафҡына түләне. Смета дисциплинаһын боҙоу һәм файҙаһыҙ расходтарға юл ҡуйыу һөҙөмтәһендә, еңел промышленность Министерствоһы предприятиелары буйынса 1947 йылда бөтәһе 2 миллион һумдан артыҡ накопление алып еткерелмәне. Еңел промышленность министры иптәш Ғирфановтан, һеҙҙең предприятиеларегеҙ ошондай бик ҙур юғалтыуҙарға ҡасанға тиклем юл ҡуйып килерҙәр икән? — тип һорау бик урынлы.

Биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн илебеҙҙә йәйелдерелгән социалистик ярыш һөҙөмтәһендә хеҙмәт етештереүсәнлегенең артабан үҫеүе өсөн яңы резервтәр асыла. Республикабыҙҙың алдынғы предприятиеларенда эшләп сығарылған продукцияның үҙенә төшөү хаҡын максималь рәүештә арзанайтыу, накоплениеларҙы арттырыу, рентабеллелек өсөн һәм государство дотацияһын кәметеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе эҙләп табыуҙа бик ҙур эш үткәрелә. Мәҫәлән, Башмельтрест (директоры иптәш Петров) 1947 йылда бюджеттән 857 мең һум государство дотацияһы алғайны, ә 1948 йылда инде ул государство дотацияһы алманы һәм 1948 йылдың дүрт айы эсендә 136 мең һум накопление бирҙе.

Ләкин, үкенескә ҡаршы, беҙҙә бюджет ассигнованиеларен күберәк «һатыулашып алырға» һәм государство иҫәбенә үҙҙәренә еңел тормош тыуҙырырға ынтылған предприятие етәкселәре лә бар. Мәҫәлән, аҙыҡ промышленносе Министерствоһының декстрин заводы директоры иптәш Моратов 1948 йылда государствонан дотация алмайынса йәки уны минимум кәметеүгә мөмкинлеге була торып та, шундай юлға баҫты.

Государство сауҙаһы табыштарынан отчисление 16.739 мең һум һәм кооперациянан доход буйынса алына торған налог 12.982 мең һум суммала күҙҙә тотола. Сауҙанан доходтарҙың тулыһынса инеүе тауар әйләнеше планын үтәү, государство сауҙаһы һәм потребкооперация предприятиеларенең рентабеллеген күтәреү менән хәл ителәсәк. Сауҙа ойошмаларының эшендә ҙур етешһеҙлектәр булғанлығын билдәләп үтергә кәрәк. Ҡайһы бер сауҙа работниктәре тауарҙарҙы бүлеү методын әле һаман тамамлай алмайҙар, тауар ассортиментәрен киңәйтеү һәм сифатын яҡшыртыу тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр. Һөҙөмтәлә республиканың сауҙа ойошмалары бик күп тауарҙарҙың йыйылып ятыуына юл ҡуйҙылар.

Беҙҙең республикабыҙҙың урындағы сырьенан киң ҡулланыу тауарҙарын массовый рәүештә эшләп сығарыу өсөн мөмкинлектәре бик ҙур. Был йәһәттән район промышленносе бик ҙур роль уйнарға тейеш. Ләкин Башҡорт АССР-ының күп кенә районларында был мөмкинлектәр сиктән тыш йомшаҡ файҙаланыла. Районларҙа төҙөү материалдарына ҙур мохтажлыҡ булыуға ҡарамаҫтан, 1947 йылда 69 райпромкомбинаттың тик 37-һе генә кирбес етештереү менән шөғөлләнеп, планды 57 процентҡа генә үтәне. Шуның менән бергә, бер мең дана ҡыҙыл кирбестең үҙенә төшөү хаҡы Туймазы райпромкомбинатында 1544 һумға, Благовещен райпромкомбинатында — 1340 һумға төштө. Ә Баҡалы районында ул 352 һумға, Белокатай районында—347 һумға тура килә.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре исполкомдары, урындағы һәм аҙыҡ промышленносе Министерстволары һәм яғыулыҡ промышленносе управлениеһе район промышленносенең артта ҡалыуын тиҙерәк бөтөрергә, эшләп сығарыла торған продукцияның ассортиментен киңәйтергә һәм тауар әйләнешен яҡшы сифатлы тауарҙар менән тулыландырырға тейештәр.

Республиканың промысловый кооперацияһы 1947 йылдың планын 105 процентҡа үтәһә лә, ассортиментәр буйынса планды ҡәнәғәтләнерлек үтәмәне. Етештерелергә тейешле булған 21 ассортименттең 14-е генә үтәлде. Тауарҙарҙың сифаты һәм халыҡтың тормош талаптарын хеҙмәтләндереүсе мастерскойҙарҙың эш сифаты һаман да түбән кимәлдә әле.

Промкооперацияның һәм урындағы промышленностең эшендә бик серьез булған тағы бер әһәмиәтле мәсьәләгә туҡталмай мөмкин түгел. Тикшереү материалдары нигеҙендә Башҡортостан Хөкүмәте уҙған йылда уҡ әле урындағы промышленность промкооперация предприятиеларенә спекулянт элементтәренең үтеп инеү фактыларын билдәләгәйне. Был спекулянттәр, кооперация һәм государство ойошмаларының исемдәренә йәшеренеп, фактик рәүештә үҙҙәре өсөн эшләп, кеҫәләрен ҡалынайталар. Мәҫәлән, Башкопинсоюздың «Надомник» артелендә өйҙә эшләүселәрҙең береһе үҙенең квартираһында күҙгә мастерскойы асҡан һәм күҙгәләр менән һатыу итә. Тикшереү ваҡытында әҙер 50 күҙгә табылды. Был күҙгәләрҙе яһауға артель тарафынан заказ булмаған.

Стәрлетамаҡтағы «Интеграл» артеле фотография асҡан һәм уны хосуси кеше ҡулына биреп ҡуйған. Ул, артель исеме аҫтында йәшеренеп, районға сығып йөрөп, үҙ файҙаһына эшләгән.

Промысловый кооперация етәкселәре БАССР Министрҙар Советының ҡарарын үтәмәнеләр һәм артелдәргә, урындағы промышленность предприятиеларенә хосуси кешеләрҙең үтеп инеүҙәренә политик әһәмиәт бирмәнеләр һәм тормош кәрәк-яраҡтарын хеҙмәтләндереүсе мастерскойҙарҙа бындай серьез етешһеҙлектәргә ҡаршы ныҡышмалы көрәш алып барманылар. Бындай тупаҫ боҙоуҙарҙы иң яҡын ваҡыт эсендә тамырынан бөтөрөргә, промкооперация артелдәренең һәм урындағы промышленность предприятиеларенең хужалыҡ эшмәкәрлектәрендә нығлы тәртип булдырырға кәрәк.

Бюджеткә халктан инә торған доходтар

Халыҡтан алына торған налогтар һәм түләүҙәр хеҙмәтсәндәрҙең киң ҡатламдарының интерестәренә ҡағылалар. Шуға күрә урындарҙа налог закондарын дөрөҫ тормошҡа ашырыу политик яҡтан ҙур әһәмиәткә эйә булып тора. Беҙҙең республикала налог эшенең сиктән тыш насар тороуын билдәләргә кәрәк. Башҡортостан финанс органдары 1947 йылда налог планын үтәмәнеләр. Айырым районларҙа һәм тотош республика буйынса ҙур недоимка килеп тыуҙы. Финанс органдары 1948 йылдың I кварталында ла планды үтәмәнеләр.

Налог һалыуҙы был эште яҡшы белмәгән агенттәргә артыҡ дәрәжәлә ышанып тапшырыу был етешһеҙлектәрҙең төп сәбәбе булып тора. Һөҙөмтәлә законды боҙоуға юл ҡуйылды. Был боҙоуҙар хужалыҡтарҙы һәм уларҙың доход сығанаҡтарын иҫәпкә алып еткермәүҙә, налог буйынса льготаларҙың дөрөҫ бирелмәүендә күҙәтәлә. Ә налогтар алған ваҡытта государство средстволарын тыҙҙырыу һәм урлау ваҡиғалары булды.

Государство страхованиеһе финанс эшенең иң артта ҡалған участкаларынан береһе булып тора. 1947 йылда страховой түләүҙәрҙе йыйнау планы республика буйынса ни бары 80,1 процентҡа генә үтәлде. Страхованиеның иркле төрҙәре бигерәк тә артта бара.

Государство заемдарынан инә торған средстволар беҙҙең бюджетте ҙур доход сығанағы булып тора. СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Өсөнсө государство заемына яҙылыу республикабыҙҙың ҡалаларында һәм ауылдарында, бөтә Советтәр Союзындағы кеүек үк, ҙур политик күтәренкелек менән үтте. Башҡортостандың эшсәндәре 213 миллион 843 мең һумлыҡ яңы заемға яҙылдылар. Ауылдағы подписка суммаһының 70,6 проценте аҡсалата индерелде лә инде.

Халыҡтың средстволарын һаҡлыҡ кассаларына ылыҡтырыу беҙҙең шарттарҙа бик әһәмиәтле. 1948 йылдың беренсе майына республиканың һаҡлыҡ кассаларында ҡалған вкладтарҙың суммаһы һуғышҡа тиклемге вкладтар суммаһы кимәленән ике тапҡырға артып китә. Ләкин, әле беҙҙең күп кенә һаҡлыҡ кассалары аҡса реформаһынан һуң үҙгәргән шарттарҙы иҫәпкә алмайынса эшләүҙә дауам итәләр һәм уларҙа вкладтар суммаһы бик аҙ. Айырым һаҡлыҡ кассаларында нормаль эш шарттары тыуҙырылмаған. Республиканың финанс органдары һәм урындағы Советтәр һаҡлыҡ кассаларының эштәрен тамырынан яҡшыртырға, уларҙы халыҡ алдында авторитетле, ысын-ысынлап культуралы учреждениегә әйләндерергә тейештәр.

1948 йылға Башкорт АССР-ы бюджетенең расходтары

Бюджет расходтары, юғарыла әйткәнемсә, 876.124 мең һум суммала күҙҙә тотола. Был средстволар нисек бүленәләр?

Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә 101.480 мең һум, социаль-культура сараларына — 689.170 мең һум, идара итеүгә — 77.972 мең һум һәм башҡа расходтарға 7.532 мең һум проектлаштырыла.

Халыҡ хужалығын финансировать итеүгә билдәләнгән 101.480 мең һум суммаһындағы дөйөм расходтарҙан: промышленносте финансировать итеүгә 53.951 мең һум ебәрелә — был үткән йылғыға ҡарағанда 25,4 процентҡа артыҡ; ауыл хужалығына 15.990 мең һум —был үткән йылғыға ҡарағанда 24,0 процентҡа артыҡ тигән һүҙ. Халыҡ хужалығы буйынса капиталь төҙөлешкә 16.113 мең һум, шул иҫәптән бюджет иҫәбенә 13.135 мең һум ебәрелә.

Күрәһегеҙ, капиталь төҙөлешкә бик күп аҡса бүлеү күҙҙә тотола. Бурыс — был аҡсаларҙы дөрөҫ, экономиялы һәм ҙур эффект менән файҙаланыуҙан тора. Уҙған йылда күп кенә предприятиелар һәм ойошмалар төҙөлөш эштәренә ебәрелгән аҡсаларҙы ҡәнәғәтләнмәҫлек рәүештә файҙаландылар, техник документацияларҙы төҙөүҙе оҙаҡҡа һуҙҙылар, төҙөү эштәренең байтаҡ ҡиммәтләнеүенә юл ҡуйҙылар.

Урман промышленносе Министерствоһы техник документацияны һуңлатыуы арҡаһында, 1947 йылда төҙөү эштәренә бары тик йылдың икенсе яртыһында ғына тотондо һәм капиталь төҙөлөш планын бары тик 56 процентҡа, шул иҫәптән, юл төҙөү эштәре планын бары 30 процентҡа ғена үтәне.

Урман промышленносе Министерствоһында һәм уның предприятиеларенда төҙөлөштәң сметаһына контроль йомшаҡ үткәрелә.

Торлаҡ-коммуналь хужалығы буйынса капиталь эштәр планы айырыуса насар үтәлде. Капиталь төҙөлөш планының үтәлмәүендә төп сәбәптәрҙең береһе—төҙөлөш ойошмаларының, атап әйткәндә, Башстройтрестең һис тә ҡәнәғәтләнерлек эшләмәүендә; ул торлаҡ-коммуналь хужалыҡ буйынса төҙөлөш программаһын бары тик 31,5 процентҡа ғына үтәгән, ә коммунальниктәрҙең торлаҡ йорто, Өфө ҡалаһындағы гостиницаны төҙөп бөтөрөү кеүек һәм башҡа ошондай төҙөлөш эштәренә трест башламаған да әле.

Үткән йылда яңы төҙөлөштәрҙе эшкә индереү планы ҡәнәғәтләнерлек үтәлмәне. Мәҫәлән, Комбанк аша финансировать ителә торған төҙөлөштәр буйынса төҙөлөш планы 54 процентҡа үтәлгән бер ваҡытта, төҙөлгән йорттарҙы эксплоатацияға биреү планы бары тик 35 процентҡа ғена үтәлде.

Капиталь төҙөлөш планын үтәү быйыл да ҡурҡыныс тыуҙыра.

Обороттағы средстволарҙың үҫеүе 17.674 мең һум, шул иҫәптән, бюджет иҫәбенә 8.501 мең һум күҙҙә тотола, ә государство предприятиеларенең һәм ойошмаларының ҡарамағында обороттағы средстволар 114 миллион һум буласаҡ. Обороттағы средстволарҙы дөрөҫ файҙаланыу һәм уларҙың әйләнешен тиҙләтеү предприятие һәм хужалыҡ ойошмалары етәкселәренең иң мөһим бурысы булып тора. Ләкин был средстволар һәр ваҡыт рациональ файҙаланып еткерелмәй.

Социаль-культура сараларына тотола торған расходтар

Совет Хөкүмәте халыҡ массаларының культураһын күтәреүгә бик ҙур иғтибар бирә һәм хеҙмәтсәндәрҙең ихтыяждары тураһында айырыуса хәстәрлек күрә. Мәғариф һәм һаулыҡ һаҡлау эштәренә йылдан-йыл арта барған ассигнованиелар был хәстәрлектең асыҡ күҙәләнеше булып тора.

Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджете буйынса социаль-культура сараларына расходтар 689.140 мең һум суммала, үткән йылға ҡарағанда 77.050 мең һумға артыҡ күҙҙә тотола. Был ассигнованиеларҙа төп урынды мәғариф эшенә билдәләнгән расходтар ала, был эшкә 503.322 мең һум проектлаштырыла.

Республика мәктәптәрендә быйыл 598 мең бала уҡытыласаҡ, был, үткән йылға ҡарағанда, 63 меңгә артыҡ тигән һүҙ. Был мәктәптәрҙе тотоуға 1948 йылда 289.510 мең һум билдәләнә, 1947 йылда был эшкә 261.204 мең һум тотолғайны.

Балалар йорттарын тотоуға һәм балаларҙың үкһеҙлегенә ҡаршы көрәш буйынса күреләсәк сараларға бик күп ассигнованиелар ебәрелә. Был маҡсаттарға тотоласаҡ расходтарҙың дөйөм суммаһы 105.464 мең һум билдәләнелә.

Балалар баҡсаларына 22.829 мең һум, кадрҙар әҙерләүгә 28.863 мең һум, фәнгә — 6.214 мең һум күҙҙә тотола һәм башҡалар.

Беҙҙең илебеҙҙә балалар һәм әсәләр айырыуса хәстәрлек менән солғап алынғандар. Балалар баҡсаларын, балалар йорттарын тотоуға билдәләнгән ҙур ассигнованиелар, бигерәк тә күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә государство пособиелары түләү бының асыҡ күҙәләнеше булып тора. 1947 йыл эсендә генә беҙҙең республикабыҙҙа Союз бюджетенән 93 миллион һум пособие бирелгән.

Библиотекаларҙы, уҡыу өйҙәрен, ауыл клубтарын һәм башҡа культура-ағартыу учреждениеларен тотоуға бюджеттән 20.395 мең һум проектлаштырыла. 1948 йылда был средстволар иҫәбенә 233 район һәм ауыл библиотекаһы, 63 район культура йорто, 879 уҡыу өйө, 380 ауыл клубы һәм башҡа күп кенә культура-ағартыу учреждениелары тотоласаҡ.

Күрәһегеҙ, мәғариф эштәренә ҙур средстволар ебәрелә. Был средстволарҙың максималь рәүештә файҙалы һәм эффектле итеп тотолоуҙарына өлгәшергә кәрәк. Ләкин был мәсьәләлә эштәр бик яйлы түгел. Мәғариф Министерствоһына ҡараған балалар йорттарында аҙыҡ продукттарын, инвентарҙарҙы законһыҙ файҙаланыуға, ә ҡайһы бер ваҡытта уларҙы урлауға, ярҙамсы хужалыҡтарҙа эште хужаһыҙ алып барыуға юл ҡуйыла. Дөйөм уҡытыу мәктәптәрендә аҡсаларҙың эффектле тотолмауының сәбәбе ҡайһы бер район, ҡала Советтәре исполкомдарының һәм халыҡ мәғарифе органдарының дөйөм мәжбүри уҡытыу тураһындағы законды боҙоуҙарында, мәктәп йәшендәге балаларҙың уҡытылмай ҡалыуҙарына һәм йыл әйләнәһендә уҡыусыларҙың таралыуҙарына юл ҡуйыуҙарында. Класта ултырып ҡалған балаларҙың һаны әле булһа күп.

Кластарҙы тулыландырыу эшен дөрөҫ ойоштороғанда, государство аҡсаһына бик күп экономия яһалыр ине һәм шуның менән бергә беҙҙең мәктәптәребеҙгә бик кәрәк булған байтаҡ уҡытыусылар бушар ине.

Искусство эшенә йыл һайын күп средстволар ебәрелә. Быйыл был маҡсатҡа 7.628 мең һум аҡса ебәреү күҙҙә тотола. Театр етәкселәренең күп ваҡыттарҙа совет һумын һаҡлыҡ менән тотолмауҙарын, финанс дисциплинаһын тупаҫ рәүештә боҙғанлыҡтарын һәм государство аҡсаларын, бигерәк тә яңы постановкаларға артыҡ тотоноуға юл ҡуйғанлыҡтарын әйтмәй үтеү мөмкин түгел.

Күп театрҙарҙы финансировать итеүҙең төп сығанағы булып билеттәр һатыуҙан алынған доходтар тормай, ә бюджеттән бирелгән дотация тора; тамыр йәйеп алған был яраҡһыҙ практиканы Совет Хөкүмәте ғәйепләне. Был иждивенселек практикаһы беҙҙең республика театрҙарында ла киң урын алған. 1947 йылды беҙҙең театрҙарыбыҙ 1.748 мең һум суммала пландан тыш зарар менән тамамланылар.

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре Управлениеһе театрҙарҙың эштәрен 1948 йылда ла яҡшыртманы. 1948 йылдың беренсе кварталында театрҙар доход өлешен бары тик 62,6 процентҡа ғена үтәнеләр.

Театрҙарҙың етәкселәренән һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре Управлениеһенең начальнигы иптәш Ҡуҙыевтан театрҙарҙың эштәрен киҫкен рәүештә яҡшыртыуҙы, уларҙың доходтарын максималь күтәреүҙе һәм государство средстволарын рациональ файҙаланыуҙы талап итергә кәрәк.

(Аҙағы 3-сө биттә).

* Ҡыҫҡартылған стенограмма.

Башкорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы

ашкорт АССР-ның 1948 йылға бюджете һәм БАССР-зың 1947 йылғы бюджетенең үтәлеше тураһында

Башкорт АССР-ы финанс Министре иптәш С. Ф. Вәлиевтең докланы

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).
аулыҡ һаҡлау эшенә ассигно- е үткән йылға ҡарағанда 02 мең һумға артыҡ күҙҙә то- а һәм был 176.378 мең һум кил итә. Расходтарҙы артты- нәсәбенә больницалар селтәрен койкаға, поликлиникаларҙа амбулаторияларҙа врачтарҙың ын 66-ға арттырыу күҙҙә тото- һәм башҡалар.
еспубликала дауалау учрежде- ләренең селтәре, бигерәк тә ыштан һуңғы йылдарҙа байтаҡ ты. Ләкин, әле халыҡты хеҙмәт- ләндереү сифаты байтаҡ яҡшыр- тыуҙы талап итә. Һаулыҡ һаҡлау Министерствоһы үҙ ҡарамағында- ғы учреждениеларҙа бюджет сре- дстволарын файҙаланыуға кон- троль эшен сиктән тыш йомшаҡ алып бара. Психиатрик больница- ла, Өфөнөң 1-се совет больница- һында һәм башҡа дауалау учреж- дениеларенда үткәрелгән тикше- реүҙәр һөҙөмтәһендә финанс-смета дисциплинаһын тупаҫ рәүештә бо- ҙоу ваҡиғалары асылды. Һөҙөм- тәлә йөҙҙәрсә мең һум аҡса баш- ҡа маҡсаттарға тотолған.

һәтте: 1947 йылда күп районда- рҙа бюджет үтәлешенә етәкселек итеү бер ни тиклем яҡшырған.

Шулай ҙа әле республиканың күп кенә районларында бюджет- тең әһәмиәтенә баһа биреп еткер- майҙәр һәм шуның һөҙөмтәһендә бюджет тә ҡәнәғәтләнерлек рә- үештә үтәлмәй. Бигерәк тә Архан- гель, Бөҙәяҙ, Воскресен, Ғафури, Иәрмәкәй, Зианчура, Федоровка һәм Йомағужа районларында 1947 йылғы бюджеттәр ҡәнәғәтләнер- лек үтәлмәне.

Контроль-ревизия эше тураһында

Финанс Министерствоһының нтроль-ревизия аппараты тара- нан 1947 йылда 2.486 ревизия 1948 йылдың I кварталында 8 ревизия яһалған. Ревизия ба- шында 8.820 мең һум аҡсаның ҙонһыҙ һәм урынһыҙ тотолоуы ылды. Шулай булыуға ҡарамаҫ- н, контроль-ревизия эшендә бик етешһеҙлектәр бар. Финанс инистерствоһы һәм уның урын- ғы органдары республиканың тә учреждениеларенә һәм пред- иятиеларена лә ревизия үткәреү- тәьмин итмәйҙәр. Шуның менән ргә, был ревизияларҙың сифаты күп ваҡытта ҡәнәғәтләнерлек лмай.
Бигерәк тә Иглин, Бишбүләк, Покровка, Матрай һәм башҡа ҡайһы бер районларҙың ауыл бюджеттәре үтәлешенә ревизия яһау эше насар тора.

Ведомстволарҙағы контроль эше бөтөнләй ҡәнәғәтләнерлек түгел. Тикшерелгән 10 министерствола һәм управлениела бухгалтер-реви- зорҙарҙың эш ваҡытының ни барҙ 40 проценте генә ревизияға фай- ҙаланылған. Ведомство бухгал- тер-ревизорҙары тарафынан тикшерелгән 150 предприятиенән 101-ендә финанс дисциплинаһын боҙоу, ә уларҙың ҡайһы берҙәрен- дә государство аҡсаларын әрәм- шәрәм итеү һәм урлау фактылары асылыу фактыһы ғына ла йыл һа- йын документаль ревизия яһауҙы талап итә.

Ауыл бюджеттәрен төҙөү һәм үтәү мәсьәләләренә сиктән тыш аҙ иғтибар ителә. Белорет, Иәр- мәкәй һәм Татешле районларында 1947 йылда был бюджеттәр 80 проценттән дә кәм үтәлгәндәр.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре исполкомдары һәм финанс органдары түбәнге бюджеттәрҙең үтәлешенә етәксе- лекте тамырынан яҡшыртырға те- йештәр. Районда иң мөһим сара- ларҙы үҙ ваҡытында финансиро- вать итеү был бюджеттәрҙең до- ход өлөшөнөң нормаль үтәлеүенә бәйләнгән.

Депутат иптәштәр!

Башкорт АССР-ының 1948 йыл- ға билдәләнгән һәм һеҙҙең ҡара- уығыҙға һәм раҫлауығыҙға тап- шырған бюджете республика хеҙ- мәтсәндәренең тормош интересто- ренә тулыһы менән яуап бирә.

Бюджеттең уңышлы үтәлеүе хужалыҡтың артабан үҫеүенә, культураның сәскә атыуына һәм Башкорт АССР-ы хеҙмәтсәндәр массаһының көн-күреше күтәре- леүгә булышлыҡ итер.

Большевиктәр партияһы һәм һә- йөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталин тирәһенә нык тупланған беҙҙең Башкортостан эшселәренең, кол- хозсыларының һәм интеллигенция- һының 1948 йылда һуғыштан һуң- ғы сталинсе биш йыллыҡтың бөйөк бурыстарын хәл итеүҙә яңы уңыш- тарға өлгәшәсәктәренә шик юҡ.

Райондарҙың һәм ҡалаларҙың бюджеттәре тураһында

Райондарҙың һәм ҡалаларҙың 48 йылға бюджеттәре доходтар м расходтар буйынса 601.856 мең м суммала планлаштырыла.
Түбәндәге бюджеттәрҙең әһә- әте шунда — социаль-культура реждениеләренең төп селтәре айон, ҡала, поселка һәм ауыл оджеттәренән финансировать телә. Был, ҡала һәм район Со- веттәре исполкомдары алдына бюджеттең доходтарын һәм рас- ходтарын үтәү эшен киҫкен рә- үештә яҡшыртыу бурысын ҡуя.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советы район һәм ҡала Советтәре исполкомдарының 1947 йылғы бюджет үтәлеше тураһында от- четтарын тыңланы. Отчеттарҙы тикшереү йомғаҡтары шуны күр-

16 июнда иртәнге ултырыш

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).
— Ремонт-төҙөлөш эштәре, — Мәсетле район Советы испол- омы председателе Ф. С. Сәләхов, ҙур һанда төҙөлөш материал- рҙы талап итә. Ләкин Башпо- ребсоюз уларҙы районларға һа- ан да ебәргәне юҡ әле.
Белорет ҡала Советы исполко- ы председателе А. Н. Богданов, ессияның иғтибарын төҙөлөш йошмаларының сиктән тыш ҡәнә- тләнмәҫлек эшләүҙәренә юнәлде- . Иптәш Богданов 1948 йылда аулыҡ һаҡлау эшенә тотоноу сен 160 мең һум, шулай уҡ ҡа- ның электр селтәре хужалығын отоу өсөн 180 мең һум ассигно- ать итеүҙе һорай.
Өфө ҡала Советы исполкомы редседателе депутат А. В. Крав- ов ҡаланы төҙөкләндереү һәм алыҡтың культура-тормош талап- арын ҡәнәғәтләндереү буйынса ур эштәр башҡарылыуы тураһын- а һөйләй.
Ҡаланың бюджете 1948 йылда 3 миллион һум тәшкил итә. Лә- ин унда 45-се номерлы урта мәк- әптең ремонты, гортоптың мате- иаль базаһын нығытыу, Өфө гор- омының һәм горсоветтең бина- ын төҙөү буйынса проектлашты- ылған эштәр кеүек ҡайһы бер аралар ҡаралмаған. Иптәш Крав- ов был сараларға өҫтәмә рәүештә 50 мең һум ассигновать итеүҙе орай.
Урындағы промышленность ми- нистре депутат П. В. Сливнев Башкортостандың урындағы про- мышленносендәге уңыштар тура- һында туҡтала.

Әгәр ҙә хужаһыҙлыҡты, әрәм- шәрәм итеүҙәрҙе аҙағына тиклем бөтөргәндә,—ти иптәш Сливнев,— беҙҙең уңыштарыбыҙ тағы ла ҙу- рыраҡ булыр ине.

Башкорт АССР-ы Министрҙәр Советы эргәһендәге Госплан пред- седателе депутат А. Д. Гашев үҙенең сығышында Башкортостан промышленносенең үҫеше тура- һында ҡыҙыҡлы цифрҙар килтерә.

Иптәш Гашев был уңыштар ме- нән бергә, айырым етешһеҙлектәр- ҙе, еңел промышленность Минис- терствоһының тегеү фабрикаһы, районларҙағы урындағы промыш- ленностең пландарын үтәй алмау- ҙарын әйтеп үтте.

Оло-Тиләк район Советы испол- комы председателе И. В. Опушнев районның үткән йылда социалис- тик ярышҡа ҡушылып, ниндәй уңыштарға өлгәшеүе тураһында һөйләй.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе депутат Ғ. В. Ниғмәтжанов рес- публикабыҙҙың промышленносе һәм төҙөлөш ойошмалары 1947 йылда үҙҙәренең эштәрен бер ни тиклем яҡшырттылар, тип билдә- ләй. Бер йыл эсендә воловой про- дукция етештереү 22,8 процентҡа артты. Халыҡ хужалығына капитал һалыу 26 миллионға үҫте.

— Ләкин был уңыштар, — ти иптәш Ниғмәтжанов, — беҙҙең эшебеҙҙә булған етешһеҙлектәрҙе ҡаплай алмайҙар. Һәм ул метал- лургия, машиналар төҙөү, ағыу- лыҡ промышленностәренең ҡәнә- ғәтләнмәҫлек эшләүҙәрен тәнҡит- ләй.

Депутат, профессор В. А. Смир- нова үҙенең сығышында Башкор- тостанда һаулыҡ һаҡлау эштәре- нең торошона анализ бирә. Был өлкәлә уңыштар ни тиклем ҙур булыуға ҡарамаҫтан, больницалар һәм поликлиникаларҙың эштәрен- дә етешһеҙлектәр бик күп әле. Благовар, Ҡыйғы, Хәйбулла рай- ондарында дауалау учреждение- ләре тейешенсә финансировать ителмәйҙәр.

Башкортостан ауыл хужалығы институтының агрохимия кафедра- һы мөдире депутат Ю. А. Усманов республикабыҙҙың фәнни үҫеше, Башкорт АССР-ы сауҙа министре депутат И. А. Липатов, республи- кала тауар әйләнеше планының 107,9 процентҡа үтәлеүе һәм уның өсөн сауҙа работниктәренең кө- рәштәре, БАССР Министрҙәр Со- веты эргәһендәге төҙөлөш про- мышленносе управлениеһе началь- нигы А. З. Әминев, управление предприятиеләре хеҙмәт етеште- реүсәнлеген байтаҡ арттырып яр- ты йыллыҡ планды 5 июнгә та- мамлауҙары тураһында һөйләпе- ләр.

16 июнда киске ултырыш

Башкорт АССР-ы Верховный Советы 16 июндәге киске ултыры- шында докладсының — Башкорт АССР-ы финанс Министре С. Ф. Вәлиевтең һөҙөмтәләү һүҙен тың- ланы. Иптәш Вәлиев Верховный Советҡа тикшереү һәм раҫлау өсөн индерелгән Башкорт АССР- ының бюджете бөтә яҡлап өйрә- нелде һәм бер тауыштан хуплан- ды, тине.
— Республикабыҙҙың Министр- ҙәр Советы милә, — ти иптәш Вә- лиев, — бында Министерстволар, управлениеләр һәм финанс орган- дары адрестарена ҡарата булған тәнҡиттәрҙең дөрөҫ булғанлығын Верховный Советтең сессияһына әйтергә ҡушты һәм был етешһеҙ- лектәрҙе бөтөрөү өсөн бөтә сара- лар күреләсәк.
С. Ф. Вәлиевтең тәҡдиме бу- йынса Башкорт АССР-ы Верхов- ный Советы бюджет раҫлауҙы түбәндәге тәртиптә үткәреүҙе ҡа- бул итә: Башкорт АССР-ы бюдже- тен доходтар һәм расходтар бу- йынса, республика бюджетен — поступлениеларҙың сығанаҡтары буйынса, ә расход өлөшөн дөйөм суммала разделдәр буйынса та- уышҡа ҡуйырға, 1948 йылға бюд- жет тураһындағы законды статья- лар буйынса ҡабул итергә.

Башкорт АССР-ы Верховный Советы Башкорт АССР-ының 1948 йылғы бюджетен бер тауыштан раҫлай. Унан һуң статьялар бу- йынса, һуңынан тотошлай «Баш- корт Автономиялы Совет Социа- листик республиканың 1948 йылға бюджете тураһындағы законы» бер тауыштан раҫланды.

15 минутлыҡ тәнәфестән һуң сессия «Башкорт АССР-ы Конс- титуцияһына (Төп Законына) үҙгә- рештәр һәм өҫтәмәләр индереү ту- раһындағы» мәсьәләне тикшереүгә күсте. Доклад өсөн һүҙ Редак- цион комиссияның председателе депутат Г. Ф. Шафиковҡа бирелә. Докладтан һуң сессия депутат С. Х. Әвзяновтың тәҡдиме буйын- са Башкорт АССР-ы Конститу- цияһына (Төп Законына) үҙгәреш- тәр һәм өҫтәмәләр индереү тексын бер тауыштан ҡабул итте.

Бынан һуң сессия көн тәртибе- нең 4 пунктын: «Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы- ның Указдарын раҫлауҙы» ҡарау- ға күсте. Был мәсьәлә буйынса һүҙ Башкорт АССР-ы Верховный Советы секретары депутат Ә. Н. Биктимировҡа бирелә. Сессия Башкорт АССР-ы Верховный Со- веты Президиумының беренсе сес- сияһы менән икенсе сессияһы ара- һында сығарылған Указдарын раҫлау тураһындағы ҡарарҙы бер тауыштан ҡабул итте.

Депутат В. И. Улиндең тәҡдиме буйынса сессия Башкорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы- ның киткән члендәре урынына Петр Ильич Каменевте, Нурғали Миннеғали улы Гәрәевте член итеп һайланы.

Сессия Башкорт АССР-ы Вер- ховный Советенең члендәрен һәм халыҡ заседателдәрен һәм Баш- корт АССР-ы территорияһында хәрәкәт итеүсе махсус судтарҙың халыҡ заседателдәрен һайланы.

16 июнда кис сәғәт 11-ҙә Баш- корт АССР-ы Верховный Советы- нең икенсе сессияһы үҙенең эшен тамамланы.

БӨЙӨК РЕВОЛЮЦИОН ЯҘЫУСЫ А. М. ГОРЬКИЙҘЕҢ ҮЛЕҮЕНӘ 12 ЙЫЛ



Ул бөгөн дә йәшәй

Бөгөн бөйөк совет яҙыусыһы, социалистик реализмдең нигеҙ һалыусыһы Алексей Максимович Горькийҙең үлеүенә 12 йыл тулды.

Максим Горький — гүзәл яҙыу- сы, тәрән фекер йөрөтөүсе, социа- листик гуманист булып бөгөн дә йәшәй. Уның иң яҡшы әҫәрҙәрендә совет кешеләре дошманды тиңһеҙ күрә алмауға, Ватанды йән-тән менән һөйөүгә өйрәнәләр, тәрбиә- ләнәләр.

Горький — хеҙмәткә дан йыр- лаусы, әҙәбиәткә иң беренсе бу- лып хеҙмәт кешеһенең образын килтереүсе кеше. «Кеше ғорур яңғырай», тине ул үҙенең «Тор- мош төбөндә» исемле пьесаһында. Бөйөк яҙыусы бөтә ижады буйын- са ошо ҡарашын үткәрҙе. Һәм, Ленин—Сталин партияһына тоғро булып, кешенең азат булыуына, ысын мәғәнәһендә ғорур яңғыра- уына хеҙмәт итте.

«Фома Гордеев», «Артамановтарҙың эше», «Матвей Кожемякиндең тормошо», «Кешеләрҙә», «Минең университеттәрем», «Клим Самгиндең тормошо», «Әсә», кеүек романдары менән Максим Горький киң совет халҡында ғына түгел, бөтә донъя күләмендә данлы.

Был әҫәрҙәре менән Алексей Максимович тулы әҙәби мәктәп тыуҙырҙы, Совет яҙыусылары бө- йөк дауыл ҡошоноң традициялары- рын эҙмә-эҙ дауам иттерәләр.

Шулай уҡ А. М. Горький, Чехов менән бер ҡатарҙа, бөгөнгө дра- матургияның нигеҙен һалды. Улар- ҙан башлап драматургия бары көн-күреш күренештәрен һүрәтләү- ҙән, көнбайыш драматургтарына һуҡыр эйәреүҙән ҡотолоп, реалис- тик юлға баҫа, үткер социал мәсь- әләләрҙе күтәрә. Иң беренсе бу- лып эшсе — XX быуаттың яңы кешеһе М. Горький әҫәрҙәрендә сәхнәгә сыҡты. Уның ике тиҫтәгә яҡын сәхнә әҫәрҙәре бар. «Ме- щандар», «Тормош төбөндә», «Васса Железнова», «Егор Булы- чев һәм башҡалар» кеүек пьеса- лары бөгөн дә совет сәхнәһенән төшмәй.

А. М. Горький тар мәғәнәлә генә яҙыусы түгел, революционер, об- щественник һәм бына тигән яҙыу- сылар быуынын тәрбиәләүсе лә. Ул, революциянан күп элек уҡ, Ленин, Сталин менән яҡын таны- шып, уларҙың идеяларын халыҡҡа үткәреүсе булды; революция дош- мандарын аяуһыҙ фаш итте.

Халыҡтар дуҫлығы иле — Совет- тар Союзының туғандаш респуб- ликалар яҙыусыларын, шул иҫәп- тән, башкорт совет яҙыусыларын тәрбиәләүҙә лә М. Горькийҙең әһәмиәте сикһеҙ ҙур. Дөрөҫөн әйткәндә, милли республикаларҙың әҙәбиәттәре үҙҙәренең бөгөнгө то- рошо менән бик күп өлөшөндә уға бурыслылар.

Художестволы әҙәбиәттең, А. С. Пушкин, Л. Н. Толстой, А. П. Чехов кеүек, иң ҙур фигуралары рәтенә ингән А. М. Горький кеше- лек рухында мәңге онотолмаҫ. Ул һаман алға, яҡтыға саҡырып, донъя йөҙөндә туғанлыҡ һәм ти- геҙлектең идеяларын раҫлар. Алексей Максимович: «Кеше үлә, халыҡ үлемһеҙ», тине. Эйе, халыҡ үлемһеҙ һәм уның бөйөк улдары ла үлемһеҙ!

Ғ. Рамазанов

УҠЫТЫУСЫ

А. М. Горький иҫтәлегенә

Үткән саҡта баҫыу һуҡмағынан
Иркен, яҡты мәктәп юлына,
Ҡемдәр генә бармай йәш сағында
Китаптар ҡыҫтырып ҡуйынына?
Шәлкем-шәлкем уттар тоҡанғанда
Кисен йәмләп ҡала өҫтәрен,
Күпме йәштәр төндәр йоҡламайҙар
Китап ятһа биҙәп өҫтәлен?
Китап биттәренән тере иптәш
Бала саҡта инде өйҙәргә,
Волга-әсә егете Леша Пешков
Шулай килде беҙҙең эргәгә.
Дауыл ҡошо булып көрәштәргә,
Ыласын булып күккә саҡырҙы,
Данко булып инде йөрәктәргә,
Әсә булып бирҙе батырлыҡ.
Горький, Горький!
Ниндәй оло исем,
Ҙур хәрефле Кешеһе донъяның,
Ниндәй яҡын ине уның өсөн,
Ил һулышы, намыҫы, уйҙары!
Был баһадир килә кеүек кисен
Ленин менән атлап Горкала,
Сталин менән кәңәшләшә төҫлө
Күҙен текәп оло картаға.
Ер йөҙөндә күпме һөйөү ҡалды,
Ниндәй ғүмере—ошо күңелдең,
Макаренко тоҡомо, Олег даны
Ул—Горький йәшәүе түгелме?!
Киңлек, тәрәнлеге, ҡайнарлығы
Ниндәй ине ошо йөрәктең!
Бөйөк пионер,
Миллион пионерҙарға
Һәм донъяға аҡыл өйрәтте.
Йылдар үтә. Юлдар үтелә.
Алыҫлатмай уны йылдар ҙа,
Алыҫлатмай уҙған юлдар ҙа,
Юҡһынырҙар уны кешеләр,
Уҡытыусы итеп уйларҙар,
Уҡытыусы тиеп ҙурларҙар.

М. Горький рус халкы тураһында

«Мин рус халҡын беләм һәм уның достоинствоһын ҡабартырға уйламайым, ләкин ышанам — был халыҡ ерҙең рухани тормошона, бөтә кеше өсөн дә мөһим булған, үҙенсәлекле, тәрән һәм мөһим нәмә индерәсәк» (1906).

***

«Ҡеүәтле рус телен тыуҙырған үҙ халҡына ышан, уның ижады көстәренә ышан» (1908).

***

«Кеше үлә, халыҡ үлемһеҙ» (1913).

***

«Беҙ үҙенең тәбиғәте менән бай талантлы халыҡ араһында йәшәйбеҙ, һәм быны уны бәхәсһеҙ раҫлай торған факт: көнбайыштың бер генә иле лә шул тиклем юғары процентта үҙ-үҙенән уҡыған яҙыусылар, техниктәр, төрлө секталарҙы нигеҙләүселәр бирә алғаны юҡ; ә был күренеш рус тормошо кеүек кешенең үҫеүе өсөн ауыр һәм ҡот осҡос шарттарҙа мөмкин булған икән — беҙ үҙ халҡыбыҙҙың рух көсөнә һәм талантына ышанырға хаҡлы» (1914).

***

«Беҙ рус халҡының йәш һәм әлегә асылып етмәгән көстәренә икеләнмәй ышанабыҙ; беҙ илдең аҡылына, уның мәрхәмәтле һәм гүзәл тормошҡа ихтыярына ышанабыҙ» (1916).

***

«Мин рус халҡын иҫ киткес, фантастик талантлы, үҙенсәлекле итеп күрәм» (1924).

Горький һәм мәктәп

Рус классик әҙәбиәтен, бигерәк тә Алексей Максимович Горький ижадын, мәктәптәрҙә уҡыусылар ҙур ҡыҙыҡһыныу менән өйрәнәләр.

Мәктәптәрҙә үткәрелгән экзамен һәм һынауҙарҙа уҡыусыларҙың күпселеге үҙҙәренең яҙма эштәренең темалары итеп М. Горький әҫәрҙәрен һайлайҙар һәм ундағы образдарҙы тәрән һөйөү менән һүрәтләйҙәр. «Һаҙан, иҙелгән Ниловна — аңлы, революционеркаға — хеҙмәтсән халыҡты иркә сығарыу өсөн, ҡыйыу көрәшсегә әйләнә. Горький революцион көрәш утында яңы кешенең тыуыуын күрһәтте», тип яҙа үҙенең сочинениеһендә Баймаҡ урта мәктәп уҡыусыһы Т. Хәсәнова. «Мин Ниловнаға оҡшарға тейешмен!», ти Ҡыйғы урта мәктәбе уҡыусыһы Фазылова, үҙенең яҙма эшендә.

М. Горький әҫәрҙәренән һәм публицистик мәҡәләләренән алынған үткер һүҙҙәр күп уҡыусыларҙың эштәрендә эпиграф итеп алыналар. Мәҫәлән: «Дошман бирелмәһә, уны юҡ итәләр», «Дөрөҫлөктө ҡан диңгеҙҙәре менән генә һүндерә алмайҙар!», «Дауыл! Тиҙҙән дауыл ҡуба!», «Беҙ донъяға риза-лашмаҫ өсөн килдек», «Кеше — ул ғорур яңғырай» һәм башҡалар.

М. Горький балаларҙы яратты. Ул: «балалар шатлыҡ, уяулыҡ, рух күтәренкелеге бирә торған шарттарҙа тәрбиәләнергә тейештәр», тигән фекерҙе һыҙыҡ өҫтөнә алды. М. Горький: «Үҙенең былсырағы, хәйерселеге менән кисәге көн күҙ алдынан юғалһын, уны тарихселәр генә иҫкә алһын, ул балаларға кәрәкмәй, улар өсөн зарарлы», ти Макаренкоға яҙған бер хатында.

Балалар тураһында хәстәрлеге, кешеләр тураһында гимн йырлауы менән ул башҡа яҙыусыларҙан күп айырылып тора ине.

Горький тарафынан бынан 27 йыл элек әйтелгән: «капиталист үҙенең долларын һаҡлай, ә доллар уның өсөн һәр ваҡыт кешенән ҡиммәтерәк», тигән һүҙҙәре Америка капиталистәренә характеристика биреүҙә бөгөнгө көндә бигерәк тә тапҡыр булып яңғырайҙар. Бөйөк реалист үҙенең художество әҫәрҙәрендә һәм публицистик мәҡәләләрендә күндәмлеккә өндәүселәргә киҫкен ҡаршы сыҡты. Бына уның «Мещандар тураһында яҙмаларында» әйтелгән ҡыйыу һүҙҙәр: «Түҙ!» — тине рус обществоһына Достоевский, «Усаллыҡҡа көс менән ҡаршы сыҡма!», тине Толстой. Был өндәүҙә ниндәйҙер иҙеүсе зәғифлек, хурлыҡлылыҡ, усал кәләүгә яҡын булған нәмә бар».

Горький әҫәрҙәренең тәрбиә көсө сағыштырмаһыҙ ҙур. Иң тәүҙә, ул уҡыусыларҙа ихтыяр көсө, батырлыҡ, ҡыйыулыҡ, хеҙмәт һөйөүсәнлек, маһаймаусанлыҡ сифаттары тәрбиәләү сығанағы булып тора. Бөйөк яҙыусының биографияһы үҙе генә лә былар өсөн өлгө.

Горькийҙең уҡытыусыларға ҡарата «уҡыусыларға әҙерҙе генә биреү етмәй, ә уларҙы уйларға, фекерләргә өйрәтергә кәрәк» тигән һүҙҙәре һәр ваҡыт бөгөнгө көндәге булып яңғырайҙар.

Бөйөк яҙыусы — гуманист үҙенең тормош тәжрибәһе булмай тороп, башҡаларҙы йәшәргә өйрәтеүселәрҙе фаш итте. Ул үҙ әҫәрҙәрендә вәғәҙәләүҙән ситтә булды. Уның әҫәрҙәрендәге ябай кешеләрҙең ҡатнаштары, уларҙың үҙ эштәренең дөрөҫлөгөнә ышанғанлыҡтарын күрһәтеү менән, уҡыусыны үҙ-үҙенә ҡарарға, үҙенең көсөнә ышанырға мәжбүр итә. Бына ошоноң аша ғына ла М. Горькийҙең гуманизмға өндәүенең бөтә көсөн һиҙәһең.

Бына шундай батырлыҡ, тура-лыҡ һәм ҡаршылыҡҡа бүйһонмау тәрбиәләгәне өсөн дә совет балалары М. Горькийҙе һөйәләр, уның үҙенә һәм әҫәрҙәрендәге гүзәл образдарына оҡшарға тырышалар.

В. Песков.

Пар һөрөү планын тиҙерәк үтәргә!

Туймазы районы пар һөрөү планын үтәне

ТУЙМАЗЫ. (Телефон аша, үз хәбәрсебеҙҙән). Яҙғы сәсеүҙе республикала беренсе булып тамамлаған туймазылылар пар һөрөү планын да ҡыҫҡа срокта үтәү өсөн бөтә саралар ҙа күрҙеләр. Сәсеүҙән бушаған бөтә тракторҙар, йәнле тартыу көстәре пар һөрөүгә күстеләр. Трактористар һәм һабансылар араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде.

Һәр бер колхозға һәм трактор бригадаһына пар һөрөү буйынса көндәлек графиктар бирелеп, уларҙың үтәлеше систематик рәүештә тикшерелә барылды. Эште ошондай ойошҡанлыҡ менән алып барыу һөҙөмтәһендә 15 июнгә пар һөрөү планы район буйынса артыҡлап үтәлде. 7200 гектар ер һөрөлдө.

Туймазы МТС-ы пар һөрөүҙә айырыуса яҡшы эшләне. Һәр бер колхозда договор теүәл үтәлде. Иптәш Хәсәнов етәкселек иткән трактор бригадаһы Киров һәм Калинин исемендәге колхоздарҙа 455 гектар пар һөргәндән һуң, МТС зонаһына инмәгән «Илсеньбот» колхозына ярҙам итте. Сифатҡа ныҡлы иғтибар ителде. Ер предплужниклы һабандар менән тәрән итеп һөрөлдө. Был бригада 1380 килограмм яғыулыҡ экономия яһаны.

Комсомолец-йәштәр трактор бригадаһы ла яҡшы уңыштарға өлгәште. Ул «Шишмә» колхозында 270 гектар урынына, 290 гектар пар һөрҙө.

Хәҙер күп кенә колхоздарҙа пар культивацияһы башланды, 400 гектар майҙан культивацияланды инде.

Р. Камалов.

РЕСПУБЛИКАБЫҘ КОЛХОЗДАРЫНДА ПАР ҺӨРӨҮҘЕҢ БАРЫШЫ

(план үтәлеше 1948 йылдың 15 июненә, проценттәрҙә)

Тотҡан урыны	Районлар исеме	Һөрөлдө
1.	Туймазы	103,8
2.	Яңауыл	76,6
3.	Дәүләкән	63,6
4.	Әлшәй	56,5
5.	Асҡын	54,0
6.	Өфө	52,4
7.	Покровка	51,9
8.	Оло-Тиләк	49,6
9.	Балтас	49,3
10.	Бөрө	48,9
11.	Благовещен	44,6
12.	Салауат	42,7
13.	Баҡалы	42,5
14.	Байҡыбаш	41,0
15.	Иглин	40,2
16.	Ҡандра	40,1
17.	Дыуан	40,0
18.	Ҡалтасы	37,5
19.	Стәрлетамаҡ	37,3
20.	Мишкә	37,2
21.	Белорет	36,9
22.	Тәтешле	36,0
23.	Шишмә	35,2
24.	Красноусол	33,9
25.	Белокатай	33,8
26.	Ҡыйғы	33,3
27.	Пәрмәкәй	30,0
28.	Архангель	28,0
29.	Бүздәк	28,0
30.	Шаран	27,8
31.	Маҡар	27,5
32.	Борай	26,1
33.	Саҡмағош	25,6
34.	Ҡариҙел	25,4
35.	Нуриман	25,2
36.	Миәкә	23,7
37.	Кушнаренко	23,1
38.	Әбйәлил	22,6
39.	Бураев	22,2
40.	Учалы	22,0
41.	Баймаҡ	20,2
42.	Благовар	20,1
43.	Ғафури	20,1
44.	Дүртөйлө	16,8
45.	Матрай	16,3
46.	Стәрлебаш	16,2
47.	Илеш	15,9
48.	Мәләүез	14,6
49.	Ҡырмыҫҡалы	14,6
50.	Мәсетле	14,4
51.	Ауырғазы	12,9
52.	Бишбүләк	12,1
53.	Йомағужа	11,3
54.	Абҙан	10,6
55.	Күгәрсен	9,3
56.	Федоровка	9,0
57.	Хәйбулла	6,1
58.	Воскресен	4,7
59.	Көйөргәҙе	4,2
60.	Бәләбәй	2,3
61.	Зианчура	1,3

Етәкселек итмәйҙәр

ҠАРИҘЕЛ. (Телеграф аша, үз хәбәрсебеҙҙән). Бағаҙы ауыл Советы — Ҡариҙел районында иң ҙур ауыл Советтарының береһе. Уның колхоздары Ҡариҙел МТС-ы тарафынан хеҙмәтләндерелә. Бында тракторҙар ауыл хужалығы эштәренең 75 процентын башҡарырға тейештәр. Ләкин МТС яҙғы сәсеү эштәре ваҡытында колхоздар менән төҙөлгән договорҙы үтәмәне һәм хәҙер пар һөрөүҙе лә бик аҡрын темп менән алып бара. «Знамя труда», «Ҡариҙел», Молотов, Куйбышев һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа эшләгән тракторҙар сәсеү тамамланыу менән ремонтҡа ҡуйылдылар.

Машина-трактор паркының эшен сығарыусы көндән-көн арттыра барыу өсөн большевистик көрәш юҡ. Техник тәрбиә саралары үҙ ваҡытында үткәрелмәй, шуның арҡаһында күпселек тракторҙарҙы оҙаҡ ваҡытҡа ремонтҡа ҡуйырға тура килә. Сталин исемендәге колхозда бер «НАТИ» тракторы һәм тракторист Люшкин иғтибарһыҙлығы арҡаһында ғына ярты. Трактор 4 көн эшләмәй торҙо. Туҡтамыш етәкселек иткән бригадала тракторҙарҙы һыуыт өсөн баҫыуҙан ауылға киттереләләр.

— Баҫыуҙа һыу юҡ, — ти бригадир. Ул трактор частарын һыу менән йыуырға ярамағанлығы менән дә иҫәпләшмәй. Бында төнгө сменалар ойошторолмаған. Тракторист Динисламов сменаға 6 гектар урынына, 0,98 гектар ғына ер һөрә.

Пар һөрөү графигы районның башҡа колхоздарында ла өҙөлә. Абыҙ, Бердош, Ишкәйет ауыл Советтарындағы колхоздарҙа ла тракторҙар насар эшләйҙәр. Трактористар араһында дисциплина түбән. Тракторҙарҙы бер колхоздан икенсеһенә күсереп йөрөтөп ваҡытты күп әрәм итәләр. Ә колхоз етәкселәре аттарҙы, үгеҙҙәрҙе пар һөрөүҙә файҙаланмайҙар.

«Первогорное» колхозында тракторҙар 576 гектар пар күтәрергә тейештәр. Ләкин улар ни бары 67 гектар ғына ер һөрҙөләр. Трактор бригадаларының эшен ойоштормау һөҙөмтәһендә МТС 2.500 гектар урынына, ни бары 116 гектар ғына пар күтәрҙе. Ә был зонаһы 9 колхозда әле булһа пар һөрөү башланмаған. Трактор бригадалары графигы бирелмәгән, ул МТС-тың өлкән агрономы Плотников ҡулында йөрөй. Трактористар араһында политик-массовый эштәр алып барылмай, социалистик ярыш ойошторолмаған. Директорҙың политик эш буйынса урынбаҫары иптәш Грачев бригадаларҙа бик һирәк була.

Район Советы исполкомы үҙ ултырыштарында пар күтәреү мәсьәләһен ҡараған юҡ. Район ауыл хужалығы бүлеге һәм уның мөдире Усманов колхоздарға етәкселек итеү урынына, сводкалар йыйыу менән сикләнә. Сәсеүҙе тамамлаған 20 колхоз әле булһа пар һөрөүгә тотонмаған. Районда 4.000 гектар урынына, тик 274 гектар ғына пар күтәрелгән.

Г. Исмәғилев.

Йәнле тартыу көстәре эшкә ылыҡтырылмаған

НӘРКӘЙ. (Телефон аша). Быйыл 300 гектар майҙанда арыш сәсергә тейеш булған «Игенсе» колхозында ошо көнгә тиклем бер гектар ҙа пар һөрөлмәгән. Колхоз председателе иптәш Ғизҙәтов пар һөрөүҙе өҙәләүен көс етмәү менән аңлатырға теләй. Уның был һылтаныуҙары урынһыҙ. Сөнки колхоз сәсеүҙе июнь башында уҡ тамамланы, 35 баш эш аты һәм үгеҙе күптән уҡ яҙғы сәсеү эштәренән бушаны. Уларҙың күбеһе хәҙер бер төрлө лә эштә файҙаланылмай.

«Труженик» (председателе иптәш Бычков), «Трактор» (председателе иптәш Сиражетдинов), Малиновский исемендәге колхоздар ҙа сәсеү эштәренән бушаған йәнле тартыу көстәре булыуға ҡарамаҫтан, пар һөрөүҙе ойоштормағандар.

Күпселек колхоздарҙа эштең сифатына иғтибар юҡ. Жданов исемендәге колхозда (председателе иптәш Павлов) һәм «Октябрь» колхозында (председателе иптәш Зарипов) бураҙналарҙың тәрәнлеге 10—12 сантиметрҙан артмай.

Г. Шәрипов.
Илеш районы.

Сит илдәрҙән телеграммалар

Румынияның Бөйөк Милли собраниеһенең иптәш И. В. Сталингә телеграммаһы

БУХАРЕСТ, 12 июнь. (ТАСС). Газеталар Бөйөк Милли собраниеһенең И. В. Сталинға яҙған һәм көслө алҡыштар менән ҡабул ителгән рәхмәт белдереү телеграммаһын баҫып сығарҙылар.

«Румыния халҡ республикаһының Бөйөк Милли собраниеһе Румыния эшселәр партияһының инициативаһы буйынса, эшселәр синыфы һәм ... уның хаҡ ... был тарихи ... Румыния ... тулаҡ йылы ... Советтар Союзына рәхмәт белдереүҙе бурыс итеп һанай. Был хатта һеҙ Румынияның репарацион түләүҙәрен 50 процентҡа кәметеү тураһында Совет Хөкүмәтенең ҡарары хаҡында белдерәһегеҙ. Һеҙҙең тарафтан Румыния халҡ республикаһына биргән яңы, бик әһәмиәтле ярҙам өсөн Бөйөк Милли собрание һеҙгә бөтә халыҡтың ихлас рәхмәтен белдерә.

СССР-ҙың социалистик государствоһы тарафынан беҙгә күрһәтелгән был ярҙамда беҙ Советтар Союзының үскәндән-үҫә барған бөйөк экономик көҫәтенең шаһиты булабыҙ. Үҙенең ошо бөйөк экономик көҫөтө арҡаһында ул ҙур государстволар экономик ярҙамын алыусы илдәрҙе үҙҙәренә буйһондорорға тырышмай. Был ярҙам Советтар Союзының тышҡы политикаһының милли бойондороҡһоҙлоҡтарын, донъяла демократияны аяҡҡа баҫтырыусы тыныс илдәр өсөн көрәшеүсе халыҡтарға ярҙам политикаһының ҡаҙаҡланеше булып тора. Румыния халҡ республикаһын тиҙерәк үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк булған ошо тиклем ҙур экономик ярҙам, Советтар Союзының данлы ҡоралы көстәре тарафынан азат ителгән хеҙмәтсе Румыния сит ил империализменә хеҙмәт итеүсе эксплуататор синыфтарҙың бәйләнеш башҡа таяныс була алмауын ... беҙгә аңлайбыҙ. Румыния халҡ республикаһы эшселәр синыфы етәкселегендә ысын демократик юлында, СССР менән дуҫлыҡ һәм союзда булыу юлында, бөтә донъя халҡтары араһында ныҡлы тыныслыҡ өсөн актив көрәш юлында бара.

Румын халҡы, был ярҙамды файҙаланып, империализмға ҡаршы көрәшеүсе һәм демократия лагерен ныҡытыу эшендә актив фактор булған, бөтә ер шарында тыныслыҡ өсөн көрәшеүсе көстәрҙе ысын туғандарса бер берекмәһе булған ... Халыҡ республикаһының пар ихлас үҫтереүҙе тиҙләтәсәк.

Совет Хөкүмәтенә, халҡҡа һәм данлы коммунистар (большевиктар) партияһына рәхмәт таңбалырыуы үтенеп, һеҙгә мөрәжәғәт итеп, беҙ, Бөйөк Сталин, һеҙгә үҙенең иркле һәм бәхетле тормошон корыусы беҙҙең халыҡты тураһында һәр ваҡыт атайҙарса хәстәрлек күрһәтеүе һеҙгә айырыуса яҡынлыҡ менән рәхмәт тойғоларыбыҙҙы еберәбеҙ.

Йәшәһен бөйөк совет халҡы!
Йәшәһен Румын-Совет дуҫлығы!
Йәшәһен халыҡтарҙың даһи юлбашсыһы Генералиссимус Сталин!».

Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһы съезынан И. В. Сталингә котлау телеграммаһы

БУДАПЕШТ, 14 июнь. (ТАСС). Кисә Венгрияның хеҙмәтсәндәр партияһының беренсе съезында, ҙур күтәренкелек менән, И. В. Сталинға түбәндәге телеграмма ҡабул ителде:

Мәскәү, Кремль
Иосиф Виссарионович Сталингә
«Ҡәҙерле иптәш Сталин!

Венгрияның коммунистар һәм социал-демократтар партиялары берләштереү съезы, Венгрия эшселәр хәрәкәтендә таркаулыҡҡа сик ҡуйҙы, Венгрия эшселәр синыфының көсөтлә массовый партияһын, хеҙмәтсе халҡ партияһын — Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһын төҙөнө. Берләштереү съезы ҙур хөрмәт һәм ҡайнар мәхәббәт менән үҙ көрәшенең ... Советтар Союзының һәм коммунистар (большевиктар) партияһының бөйөк даһиен тәбрик итә.

Венгрияның хеҙмәтсән халҡы һеҙҙең, бөйөк совет халҡының һәм данлыҡлы Совет Армияһының ярҙамында немец фашизменең һәм Венгрия реакцияһының йәберләүҙәренән котолғанлығын бер ваҡытта ла онотмаҫ. Икенсе бөтә донъя һуғышы осорында тик Советтар Союзы халҡының айырыуса ҡорбандар биреүе генә Венгрия халҡына иркле йәбәрлеүҙән ҡотолорға һәм прогресс юлына баҫырға мөмкинлек биргәнен Венгрияның хеҙмәтсән халҡы аңлай. Һеҙ етәкселек иткән Советтар Союзының тыныслыҡ политикаһы Венгрияға иркле һәм тыныслыҡ менән үҫеүҙе тәьмин итә.

Венгрияның хеҙмәтсәндәр партияһы Маркс — Энгельс — Ленин — Сталин уҡыуының еңелмәҫ ҡоралынан тайшанмаҫтан, Советтар Союзы халҡтары менән дуҫлыҡ һәм союзды нығытыуҙа, үҫтерәсәк, һәм үҙ илебеҙ бойондороҡһоҙлоғо өсөн, демократик еңеүҙәрҙе үҫтереү өсөн, тыныслыҡты һаҡлау өсөн, тыныслыҡты боҙорға тырышыусыларға ҡаршы ҡаты көрәшәсәк.

Венгрия хеҙмәтсәндәр партияһының беренсе съезы. Будапешт, 13 июнь, 1948 йыл.

Греция һәм Болгария мөнәсәбәттәренә ҡарата

НЬЮ-ЙОРК, 14 июнь. (ТАСС). Берләшкән милләттәр ойошмаһының секретариаты былай тип белдерҙе: Берләшкән милләттәр ойошмаһының генеральный секретаре Трюгве Ли Болгарияның сит ил эштәре министре Коларовҡа, Греция һәм Болгария араһында дипломатик мөнәсәбәттәр булдырыу тураһында Болгарияның тәҡдимен Греция хөкүмәте ҡабул итте, тип хәбәр итте.

Клемент Готвальдтың Чехословакия республикаһының президенте итеп һайлау тураһында

ПРАГА, 14 июнь. (ТАСС). Чехословакия телеграф агентлығының хәбәр итеүенә ҡарағанда, гөн милли собраниеһенең тантаналы ултырышында, 296 депутат һайлағанда, Чехословакия республикаһының премьер-министры Клемент Готвальд бер тауыштан республиканың президенте итеп һайланған.

Яңы һайланған президент сәғәттә 45 минутта президент антын биргән.

Чехословакия хөкүмәтенең отставкаға сығыуы

ПРАГА, 14 июнь. (ТАСС). Чехословакия республикаһының президенте Готвальд хөкүмәттең отставкаға сығыуын ҡабул итте. Яңы хөкүмәтте төҙөү эшен президент, элекке хөкүмәт составында премьер-министрҙың урынбаҫары булған Антонин Запотоцкийға тапшырҙы.

Чехословакияның яңы хөкүмәте

ПРАГА, 15 июнь. (ТАСС). Чехословакия республикаһының президенте Клемент Готвальд бер хөкүмәттең яңы составын раҫланы. Хөкүмәт составына түбәндәге кешеләр инделәр:

Премьер-министр — Антонин Запотоцкий (Чехословакия компартияһы), премьер-министр урынбаҫарҙары: Вилем Широкий (Словакия компартияһы), Зденек Фирлингер (социал-демократия партияһы), Ян Шевчик (Словакияның яңынан төҙөү партияһы), сит ил эштәре министре — Владо Клементис (Словакия компартияһы), милли оборона министре — Людвиг Свобода (партияһыҙ), эске эштәр министре — Вацлав Носек (Чехословакия компартияһы), ... тариф министре — Зденек Неедлы (Чехословакия компартияһы), тышҡы сауҙа министре — Антонин Грегор (Чехословакия компартияһы). Кабинеттағы ҡалған урын түбәндәгесә бүленгән: Чехословакия компартияһы — 5 урын, Словакия компартияһы — 1 урын, Социал-демократия партияһы — 1 урын, Словакияның азатлыҡ партияһы — 1 урын, Чехословакияның социалистик партияһы — 2 урын, халҡ партияһы — 2 урын алды.

Франция Германиялағы көнбайыш оккупацион зоналарының командующийҙарының кәңәшмәһен кисектереүҙе һорай

ЛОНДОН, 14 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Париждан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Франция хөкүмәте Англия һәм АҠШ хөкүмәттәренә, оккупацион зоналар командующийҙарының һәм ... премьер-министрҙары менән ... лектә, 15 июнда, Франкфуртта Германия тураһындағы яңы ... лы тикшереүҙе үткәреү кәңәшмәһен кисектереү тураһында ... рау менән мөрәжәғәт итте.

Трасса һулышы

Әле, буласаҡ тимер юл трассаһы участкаларында эшләүсе бригадалар һәм звенолар тарафынан өйөлә торған насыптең күләме ҙурҙан түгел: ситтәнерәк ҡараһаң, һуңынан бер тигеҙ һыҙыҡта бергә тоташтырылыр өсөн матурлап, геометрик теүәл дүрткел-дүрткел итеп күтәртелгән түтәлдәрҙе генә күргән кеүек булаһың. Бер тигеҙ киңлектә, билдәләнгән бейеклектәге насыпь өйөмдәренең оҙонлоғо минутлап—сәғәтләп арта. Уларҙың аралары, бергә ҡушылыр өсөн бер-береһенә ынтылған тереклөмеш бөртөктәре тиҙлегендә, тип әйтерлек, күҙгә күренеп яҡынлашҡандан-яҡынлаша бара. Инде Ағиҙел туғайҙарының буйынан-буйына — Ишембай артындағы тигеҙлектәрҙән Ермолаевка ҡалҡыулыҡтарынаса — һуҙыласаҡ тимер юл таҫмаһын күҙ алдына килтерәһең, уның буласаҡ ҡеүәтен һәм данын бөтә тулылығында тояһың. Берҙәм эшкә — көрәшкә сыҡҡан төҙөүсе халыҡтың ихтыяр көсөнә, тәүәккәллегенә ысын күңелдән ышанмаҫҡа мөмкин түгел...

Скреперен яйлап тотоп ат ҡыуалаусы йәш егет тә, ярһып, сәмләнеп ер ҡаҙыусы колхозсы ҡыҙ ҙа ошо оло ышаныс менән рухланып эшләй. Сталинсе яңы биш йыллыҡ планда бөйөк төҙөлештәрҙең әһәмиәтле бер өлөшө итеп күрһәтелгән һуҙҙе ... күкрәк көсө һәм маңлай тире менән ныҡыта ул — бындағы эшсе. Иртәнән кискә тиклем башын да күтәрмәйенсә эшләй. Иркенләп тын алыр өсөн туҡталғанда ла эргәһендәге иптәшенә ҡарап ҡуя: «бик уҙҙырып ебәрмәгәнме?» Төшкө ашҡа туҡталған минуттарҙа инде, тартынып тороу юҡ: икәүләп, өсәүләп тә, бөтә бригада менән бергәләп тә йәнәштәге участкала эшләүселәрҙе тынғыһыҙ күҙ ҡараштары «прицелен» алалар. Шул ике арала кемдер йыр башларға өлгәрә, гармонсы егет тальянын ҡулға алыуға, бөтәһе лә берҙәм рәүештә шат йырҙы күтәреп ебәрәләр:

Киң туғайҙарға йәм биреп,
Тимер юлдар һалабыҙ,
Ярышта алда барабыҙ, —
Иләс, әйләнеп ҡарағыҙ!

Ворошилов исемендәге колхоздың йәштәре күрше участкаларға саҡырыу ауаҙы ташлап шулай йыр йырлаһалар ҙа, үҙҙәренекеләр — ауырғазылылар араһында беренселекте тотоусылар булһалар ҙа, бөгөнгө эш менән бик үк маҡтанырлыҡ түгел икәнлекте беләләр. — Ауырғазы районынан да яҡшыраҡ эшләүсе Стәрлетамаҡ районы, бөтә колхоздарҙан да уҙҙырып заданиеһен иң тәүҙә үтәп сыҡҡан, күсмә Ҡыҙыл Байраҡты яулап алған алдынғы коллектив — Карл Маркс исемендәге колхоздың төҙөүсе бригадаһы бар. Хеҙмәт пафосы менән яныпсыларҙы берләштергән төҙөлештә 15 районның тиҫтәләрсә алдынғы колхоздары, беренселек данына ынтылыусы йөҙҙәрсә ҡыйыу кешеләр бар бында. Улар бөтәһе лә трассаның тәүге километрҙарында — Стәрлетамаҡ районы участкаһында елберҙәүсе ҡыҙыл байраҡ яғына әйләнеп-әйләнеп ҡарайҙар. 94 километрға һуҙылған трассаның бөтә урындарында ла ошо байраҡ төҙөүсе — колхозсыларҙың күңелдәрен үҙенә тарта. Сөнки 10 июнда массовый рәүештә башланған төҙөү эшендә стәрлетамаҡлылар өсөнсө прораб участкаһын беренселеккә сығарҙылар. Ойошҡанлыҡтың һәм ижади хеҙмәт инициативаһының гүзәл өлгөләрен күрһәттеләр. Хеҙмәттә социалистик ярыш нигеҙендә ойоштороу тәжрибәһен уларҙан өйрәнергә, уларҙан да уҙҙырырлыҡ итеп эшләргә кәрәк инде.

Бына шуға күрә лә Стәрлетамаҡ районынан бер-ике көнгә генә эшкә һуңлап башлаған Ауырғазы районы Ворошилов исемендәге колхоз йәштәре бөтә трассала беренселекте алыуҙы үҙҙәренең изге маҡсаттары итеп ҡуйғандар. Быға ирешеү өсөн уларҙың бөтә мөмкинлектәре лә бар. Комсомолецтарҙан һәм йәштәрҙән генә торған 27 кешелек бригада 4 звеноға бүленеп эшкә тотонған. Бригадир — колхоз комсомол ойошмаһының секретаре Әбделхәй Ғаббасов һәр егеттең, һәр ҡыҙҙың үҙе кеүек үк тырышып эшләүе, көндәлек норманы иң кәмендә ике тапҡырға арттырып үтәүе өсөн бөтә сараларҙы ла күрә. Эш көнөнөң һәр бер минутын дөрөҫ файҙаланыу өсөн ярыш бара был бригадала: грабарен тултырып балсыҡ ташыусы Сабит Моратов дуҫы Рәшит Ишбулдиндән уҙҙырырға тырыша, Ғәзимә Мәхмүтова звеноһының члендаре Сажидә Нагаеваның тәүге көндә үк беренселекте алған ҡыҙҙарын иҫәк тә еңеп сығырға тырышып, иртәнге ашҡа тиклем үк ер ҡаҙырға тотоналар...

Трассаның ҡайһы ғына участкаһына барһаң да, унда эшләүсе районның алдынғы колхоздары, данлы кешеләре тураһында маҡтау һүҙе ишетәһең. Уларҙың алдынғылығы әлегә көндәлек нормаларҙы үтәү менән, дүрт-биш көнлөк эш күләме менән генә үлсәнә. Ләкин тәүге аҙымдарҙа ҡыйыулыҡ күрһәтеп ынтылыш алған кеше артына әйләнеп ҡарауҙың, темптарҙы төшөрөүҙең нәмә икәнен белмәй. Өлкән мастер Квитко участкаһында эшләүсе Мәләүез егеттәре — бер туған Павел, Виктор, Николай Рябовтар беренсе көндә носилка менән балсыҡ ташыуҙа үҙ нормаларын бер ярым тапҡырға еткереп үтәгәйнеләр. Икенсе, өсөнсө көндәрҙә һәм унан һуң да һәр ваҡыт уларҙың исемдәре — участкаһың почет таҡтаһында. Был батыр егеттәрҙең эштәрен инженер Россачинский үҙе килеп ҡараны. Уларҙың етеҙлегенә, тәүәккәллегенә, уларҙың артабан да һоҡландырғыс эш күрһәткестәре бирәсәктәренә шикләнерлек түгел ине. Сөнки улар йәшлек ярһыуы менән генә, «бер тынлыҡ» ынтылыу менән генә эшләмәйҙәр. Егеттәрҙең һәр бер хәрәкәте, һәр бер минуты иҫәпле: кәрәккә-кәрәкмәгәнгә ашығып бармайҙар улар. Үҙҙәренең көстәрен бер тигеҙ тиҙлектә көндең буйына еткерәләр.

Айырым кешеләрҙең тырышлығы звеноларҙың, бригадаларҙың, тотош райондарҙың исемдәрен бөтә төҙөләш трассаһында дан һәм хөрмәт бейеклегенә күтәрә. Хәҙер, инде бер аҙнаға яҡын эшләгәндән һуң, Стәрлетамаҡ районының колхоздары тураһында ғына һөйләмәйҙәр. Улар менән бер рәттән Стәрлебаш районының Сталин исемендәге колхозы ла, Мәләүез районының «Рассвет I», «Смычка» ауыл хужалығы артелдәре лә, Әлшәй, Маҡар һәм башҡа райондарҙың төҙөүсе звенолары, бригадалары ла бар. Уларҙың бөгөнгө подвиге шунда: тимер юл управлениеһе тарафынан алып барылырға тейешле техник етәкселектең һәм техник тәьминәттең әлегә бик үк йәтеш булып етмәүенә лә ҡарамаҫтан, был коллективтар үҙҙәренең бөтә көстәрен биреп, алдан хәстәрлек күреп алып килгән инструменттарын файҙаланып, көндәлек заданиеларҙы арттырып үтәү өсөн көрәшәләр һәм башҡаларға стахановсы хеҙмәттең, берҙәмлек һәм ойошҡанлыҡтың өлгөләрен күрһәтәләр.

Дөрөҫлөктә әйтергә кәрәк: техник тәьминәт һәм етәкселек трассаның бөтә километрҙарында ла бер үк кимәлдә түгел. Тәжрибәле инженер, Ленин ордены ... Яковлевич Романов участкаһы скреперҙәрҙе киң ҡулланыу, мастерҙарҙың талапсанлығы ... көнлө рәүештә гәзиткә ... Уның участкаһы план үтәү һәм эштең сифаты яғынан беренселекте тота. Ләкин инженер ... манов менән тиңләшергә ... сылар — бындағы специалистар ... һында. Эш темптары күтәрелә. Инженер Денискин, мастер Шамаль, Квитко, Чистов — ҡайһыһы үҙ урынында ... егештереүсәнлеген күтәреү ... элекке йылдарҙа тупланған ... бәләрен ҡулланып һәм бөтә ... рен биреп тырышып эшләй. Колхоздарҙың, бригадаларҙың хатта һәр бер айырым эшсе колхозсының нисек эшләүен, яҡшыраҡ эшләй алыуын бел... ралар. Шуға ҡарап эш йөрөй булған тиклем инструмент һәм ҡатмарлы механизмдар... гәҙ итеп бүлеп бирәләр.

Трасса — әҙләкһеҙ ... трасса — гөрләй, шаулай, һәм бәхет юлы булып үҫә. Бына тәүге рельстарҙы һуҙыусы ... юлсы ла, тәүге паровозды ... килеүсе машинист тә колхоз крәстиәндәрҙең хеҙмәтенә ... күрһәтеп, һоҡланып әйтерҙәр:

— Төҙөлөштәге ер эштәре ... мыҫ менән башҡарылған!

Ғ. Әхмәтшин.
(Махсус хәбәрсе).

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-..., промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

Л 00787. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕҢ ПРОЛЕТАРИЙҘАРЫ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 121
19
июнь
шәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында Редакцион комиссия Председателе депутат F. Ф. Шафиков доклады. (1—2-се биттәр).

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 1948 йылға бюджеты тураһында Закон. (2-се бит).

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр тураһында Закон. (2—3-сө биттәр).

Ә. Бикчәнтәй. — Уның батырлығы алға саҡыра. (3-сө бит).

А. Денисов. — Урожай йыйнауға әҙерлекте бөтә яҡлап көйләргә. (3-сө бит).

ФЕЛЬЕТОН УРЫНЫНА. Ш. Юносов. — Көтөлмәгән хәл... (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Комбайндар ремонтлауҙы тиҙерәк тамамларға

Башҡортостан игенселәре иптәш Сталинға яҙған хатта юғары урожай үҫтереү буйынса бик яуаплы йөкләмәләр алдылар. Уларҙы намыҫ менән үтәү өсөн яҙғы баҫыу эштәре осоронда көсөркәнешле көрәш алып барылды. Был көрәш артабан дауам итә.

Быйыл урожай йыйнау осоронда айырыуса көсөркәнешле эшләргә тура киләсәк. Арыштың да, һабан ашлыҡ культураларының да майҙаны ныҡ ҡына артты. Уны ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнап алыу өсөн колхоз ауылында көс етерлек, тик уларҙы һуңға ҡалмайынса боевой әҙерлек хәленә килтерергә һәм урожай йыйнауға башлауҙың тәүге көнөнән үк тулы нагрузка менән файҙаланырға кәрәк.

Урожай йыйнауҙа төп көс — комбайн. Баҫыу караблдәре менән 560 мең гектар майҙанда бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайын йыйнап алырға кәрәк. Шулай булғас, был ҡеүәтле техниканы әҙерләүгә айырыуса ныҡлы иғтибар бирелергә тейеш. Комбайндарҙы ремонтлауҙа бөтә машина-трактор станцияларына ла Бәжәр МТС-ы коллективе кеүек эшләргә кәрәк. Ул 3 июнгә үк комбайндар ремонтлау планын тулыһынса үтәне. Бөтә машиналар бөгөндән урожай йыйнауға әҙер. Улар хәҙер колхоздарҙа. Комбайнерҙар үҙҙәре урып-йыйнай торған майҙандарҙы өйрәнәләр, ҡыҙыу эш ваҡытында тотҡарлыҡ булмаһын өсөн бөтә агрегат менән эш алып баралар.

Бәжәр МТС-ы был уңыштарға нисек өлгәште? Бында мастерской һәм башҡа шарттар икенсе машина-трактор станцияларындағынан бер нисләй артыҡлығы менән айырылмайҙар. Ул күптән түгел генә ойошторолған МТС. Киреһенсә, республикабыҙҙың күп кенә башҡа МТС-тарында мастерскойҙар яҡшыраҡ йыһазландырылған һәм комбайндарҙы ремонтлау өсөн уңайлы шарттар бар. Бәжәр машина-трактор станцияһының коллективе ауыл хужалығы кампанияһына [illegible]

[illegible]

Архангель, Күндрәк һәм күп кенә башҡа МТС-тарҙа әле бер генә машинаға ла ремонт тамамланмаған. Был МТС-тарҙың етәкселәре урожай йыйнау ваҡыты етеп килеүгә ҡарамаҫтан, үҙҙәрендә бер нисләй ҙә яуаплылыҡ һиҙмәйҙәр, комбайндарҙы тиҙерәк стройға индереү һәм колхоздар менән төҙәшкән договорҙы үтәүҙе тәьмин итеү өсөн хәстәрлек күрмәйҙәр.

Балтач, Байрамғол, Шишмә, Учалы, Байыш, Әбдрәшит МТС-тары ла бик ныҡ артта ҡалалар. Уларҙа машиналарҙың тик ундан бер өлөшө генә ремонтланған. Бындай әҙерлек менән, әлбиттә, урожай йыйнауҙы уңышлы башҡарып сығып булмаясаҡ. МТС етәкселәре был хәлде ныҡ иҫкә алырға һәм һис кисекмәҫтән ремонтты большевиктарса ойошторорға бурыслылар.

Комбайндар ремонтын ҡыҙыу темптар менән алып барыу, урожай йыйнау ваҡытында машиналарҙың туҡтауһыҙ һәм яҡшы эшләүҙәренә шарт тыуҙырыу — бөгөнгө көндөң мөһим бурысы. Бөтә урындарҙа ла ремонтты көсәйтеү өсөн барлыҡ комбайнерҙарҙы, уларҙың ярҙамсыларын эшкә йәлеп итергә кәрәк. Һәр бер мастерскойҙа эш ике сменала ойошторолорға, нормалар үтәлә һәм арттырылып үтәлә барылырға тейеш. Комбайндар буйынса механиктар эш процесен ойоштороуға, алдынғы машина-трактор станцияларының тәжрибәләрен киң ҡулланырға, сифатҡа айырыуса иғтибар бирергә бурыслылар. Һан артынан ҡыуып, сифат мәсьәләһен оноторға ярамай.

Хәҙер, һис кисекмәҫтән, бөтә комбайн агрегатының баҫыуҙа туҡтауһыҙ эшләүен тәьмин итеү тураһында ла хәстәрлек күрергә кәрәк. Комбайндар менән эшләргә билдәләнгән тракторҙар ҙа еткерле рәүештә әҙерләнергә тейеш. Һәр бер МТС-та иң яҡшы комбайнерҙарҙы һайлап алырға, уларға машиналар беркетергә кәрәк. Шулай уҡ комбайндар паркының бөтә эше яҡшы планлаштырылырға, урып-йыйнау өсөн тигеҙ һәм ҡый [illegible]

[illegible]

Урожай йыйнау — ваҡытлы эш. Уны һуҙырға мөмкин түгел һәм ярамай. Файҙаланылмаған һәр бер [illegible]

[illegible]

ВЦСПС президиумында

ВЦСПС-тың XVIII пленумын үткәреү тураһында

ВЦСПС президиумы 1948 йылдың 26 июлендә Мәскәүҙә ВЦСПС-тың XVIII пленумын саҡырырға ҡарар ҡабул итте. Пленумдың көн тәртибе түбәндәгесә буласаҡ:

1. Көнбайыш райондарының күмер промышленноҫы предприятиеләрендә коллектив договорҙарҙың үтәлеше барышы тураһында — министрҙың һәм профсоюз Үҙәк Комитеты председателенең докладтары.

2. Көнсығыш райондары күмер промышленноҫы предприятиеләрендә коллектив договорҙарҙың үтәлеше барышы тураһында — министрҙың һәм профсоюз Үҙәк Комитеты председателенең докладтары.

3. Туҡыу промышленноҫы эшселәренең торак-көнкүреш шарттарын яҡшыртыу тураһында — министрҙың һәм профсоюз Үҙәк Комитеты председателенең докладтары. (ТАСС).

Ҡырым совхоздарында урожай йыйнауға әҙерлек

СИМФЕРОПОЛЬ. Ҡырымдың совхоздары мул урожай йыйыу өсөн әҙерләнәләр. Ужым сәсеүҙең майҙаны 20 процентҡа арттырылды. [illegible]

Урожай йыйнау, игеҙҙә, хатмарҙы машиналар менән башҡарыласаҡ. Һәр комбайн 500 гектар майҙандың урожайын йыйнарға тейеш. Ашлыҡтарҙы тапшырыу һәм йөккә тейәү эше тулыһынса механизациялаштырыла. Юғары сифатлы орлоҡ бирә торған «Семенпульт» машиналары урынлаштырыла.

Ашлыҡ сабыла башлауға тиклем, [illegible] тамамлаясаҡтар. (ТАСС).

Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһы

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында

Редакцион комиссия Председателе депутат F. Ф. Шафиков докладды

Депутат иптәштәр!

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы 1937 йыл 23 июнда Башҡорт АССР-ының Ғәҙәттән тыш X съезы тарафынан ҡабул ителгәйне.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһы Башҡортостан халыҡтарының синыфһыҙ коммунистик общество төҙөү юлында өлгәшкән бөйөк еңеүҙәрен законлы рәүештә нығыта. Ул беҙҙең илебеҙҙә социализмдың еңеүе, республикабыҙ хеҙмәтсәндәренең капиталистик ҡоллоҡтан һәм милли иҙелеүҙән тулыһынса азат ителеүе фактыларына, СССР-ҙа киң һәм аҙағына тиклем эҙмә-эҙлекле демократияның еңеүе фактыларына нигеҙләнә.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһында сталинсә биш йыллыҡтар эсендә социалистик общество төҙөү буйынса совет кешеләренең ғәйәт ҙур ижади эштәре һөҙөмтәһендә республикабыҙ халыҡтарының политик, экономик һәм культура тормошонда булған бөтә төп үҙгәрештәр сағылдырылған.

Беҙҙең Конституциябыҙ ҡабул ителгәндән башлап гитлерсе Германияға ҡаршы һуғыш башланғанға тиклем булған тыныс хеҙмәт шарттарында үткән 4 йыл ваҡыт эсендә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре, бөтә совет халҡы менән бергә, социалистик ҡоролош нигеҙҙәрен нығытыу юлында бик ҙур эштәр башҡарҙылар.

Сталинсе Конституция беҙҙең кешеләребеҙҙе яңы хеҙмәт подвигтарына рухландырҙы.

Сталинсе Конституция байрағы аҫтында социализм һәм демократияның ҡеүәтле терәге — Совет государствоһы үҫте һәм нығыны.

Был дүрт йылдың буйына Башҡортостанда, бөтә совет илендәге кеүек үк, промышленность предприятиелары үҫте, Өфөлә, Черниковскиҙа һәм башҡа райондарҙа яңы заводтар һалынды. Ишембай районында нефть базалары киңәйҙе, Туймазы станцияһы тирәһендә беренсе скважиналар бораулады. Колхоздар һәм совхоздар нығынылар, улар илебеҙгә әленән-әле күберәк продукты һәм сырьё бирҙеләр.

Ул йылдар бөйөк социалистик демократия принциптарына нигеҙләнгән совет общественный һәм государство ҡоролошоноң байтаҡ нығыу йылдары булдылар.

Хеҙмәтсәндәрҙең политик активлеге үҫте, уларҙың социалистик аңдары күтәрелде.

Социалистик ярыш киң ҡолас йәйҙе, промышленностең һәм социалистик игенселектең йөҙҙәрсә һәм меңдәрсә стахановсылары үҙҙәренең өлгөләре менән кешеләрҙә фиҙакәр хеҙмәт дәрте тыуҙырҙылар, уларҙы яңы хеҙмәт подвигтарына күтәрҙеләр.

Урындағы милләттәр араһынан яңы эшселәр кадрҙары үҫеп сыҡты.

Беҙҙең халыҡтың, формаһы яғынан милли һәм йөкмәткеһе яғынан социалистик культураһы байтаҡ алға китте, социалистик интеллигенция сафтары артты, милли әҙәбиәт һәм искусствоның ҙур-ҙур әҫәрҙәре барлыҡҡа килде.

Бөйөк социалистик ҡоролоштоң дөйөм хеҙмәтендә башҡорт халҡының СССР-ҙағы башҡа халыҡтар менән туғанлыҡ дуҫлығы үҫте һәм нығыны. Ләкин һуғыш беҙҙең кешеләребеҙгә тыныс төҙөлөш менән шөғөлләнергә ҡомасауланы. Үҙенең күләмдәре, унда ҡулланған техниканың һаны һәм камиллләнеүе яғынан, ҡорбан булған кешеләр һаны яғынан, был һуғыш тарихҡа билдәле бөтә һуғыштарҙан да сикһеҙ ҙур булғанлығын беҙ беләбеҙ. Совет Армияһы уның төп ауырлыҡтарын үҙ елкәһендә бер үҙе кисерҙе һәм Берлин өҫтөнә еңеү байрағын урынлаштырҙы, донъяны һәм цивилизацияны фашистик погромдан ҡотҡарып алып ҡалды.

Үлемесле ҡурҡыныс көндәрендә, ҡаты һуғыштың ауыр көндәрендә беҙҙен илебеҙ берҙәм боевой лагерға әйләнде, совет халҡы большевистик партия тирәһенә һәм уның юлбашсыһы иптәш Сталин тирәһенә тағы ла тығыҙыраҡ тупланды.

Һуғыш йылдарында беҙ дошманға ҡаршы һуғышыу менән генә сикләнмәнек, бәлки үҙебеҙҙең Совет государствоһын төҙөүҙә һәм уны нығытыуҙа дауам иттек. Беҙ сырьё базаларын киңәйттек, индустрияның яңы гиганттарын сафҡа индерҙек, колхоздарыбыҙҙың һәм совхоздарыбыҙҙың сәсеү майҙандарын арттырҙыҡ.

1943 йылдың 6 ноябрендә иптәш Сталин былай тине:

«Совет государствоһы бер ваҡытта ла әле хәҙерге кеүек үк, Ватан һуғышының өсөнсө йылындағы кеүек үк, ныҡ һәм ҡаҡшамаҫ булғаны юҡ ине. Һуғыш һабаҡтары совет ҡоролошоноң тыныс төҙөлөш йылдарында илдең экономик һәм культура күтәрелешен ойоштороуҙың иң яҡшы формаһы ғына түгел, бәлки һуғыш ваҡытында дошманға отпор биреү өсөн халыҡтың барлыҡ көстәрен мобилизовать итеүҙең дә иң яҡшы формаһы булып сыҡҡанлығын күрһәтә».

Һуғыш алдынан булған йылдарҙа, сталинсе биш йыллыҡтар эсендә беҙҙең халҡыбыҙ һуғыш ихтыяждарын нигеҙҙә ҡәнәғәтләндереү өсөн кәрәкле был материаль мөмкинлектәрҙе булдырып өсөн аҙ көс түкмәне.

1917 йылдың октябрендә барлыҡҡа килтерелгән Совет власе сирек быуат эсендә беҙҙең илебеҙҙе ҡаҡшамаҫ крепоскә әйләндерҙе.

Беҙҙең еңеүебеҙ большевистик партияның тәрән аҡыллы политикаһы арҡаһында өлгәшелде. Большевиктәр партияһы бөтә совет халҡын немец илбаҫарҙарына ҡаршы изге Ватан һуғышына күтәрә алды, уны бөйөк подвигтарға рухландыра алды.

Беҙ шуға күрә еңдек, сөнки беҙҙең еңеү юлын бөйөк Сталин гений яҡтыртты.

Һуғыш тамамланғандан һуң Советтар Союзының хеҙмәтсәндәре яңынан тыныс төҙөлөшкә күстеләр. Илебеҙ алдына яңы бөйөк бурыстар килеп баҫты. Беҙгә көнбайыш райондарҙың һуғыш тарафынан емерелгән хужалығын аяҡҡа баҫтырырға, илдең бөтә экономикаһын тыныс төҙөлөш юлына күсерергә һәм яҡындағы бер нисә йыл эсендә һуғышҡа тиклемге кимәлде үтеп китеп, бөтә халыҡтың материаль көн-күрешенең артабан үҫеүен тәьмин итер өсөн, халыҡ хужалығын артабан күтәреүгә өлгәшергә кәрәк булды.

Илдең экономик ҡеүәтен нығытыу һәм уны артабан үҫтереү буйынса беҙҙең эштәребеҙҙең мәһабәт программаһы замандыбыҙҙың тарихи документында — 1946 — 1950 йылдарҙа СССР халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү буйынса биш йыллыҡ планда күҙаллангән.

Совет халҡы яңы биш йыллыҡ планды бик ҙур патриотик күтәренкелек менән ҡаршыланы: ул план беҙҙең кешеләребеҙҙең үҙ Тыуған илдәрен тағы ла көслөрәк һәм тағы ла байыраҡ итеп күрергә теләүҙәрен сағылдыра.

Башҡортостан хеҙмәтсәндәре лә, бөтә совет халҡы менән бергә, шулай уҡ һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды тулыһынса һәм арттырып үтәү өсөн дә ҙур дәрт менән эшләйҙәр.

Яңы биш йыллыҡтың үткән ваҡыттары эсендә эшләнгән эштәрҙең йомғаҡтары, республикабыҙҙың эшселәре, крәҫтиәндәре һәм интеллигенцияһы пландағы талаптарҙы срогында үтәү менән генә ҡалмайынса, бәлки уларҙы байтаҡ арттырып үтәрҙәр, тип әйтергә мөмкинлек бирәләр.

Беҙҙең илебеҙҙә башҡаса булыуы ла мөмкин түгел.

«Программабыҙҙың реаль булыуы, ул — тере кешеләр, — тине иптәш Сталин, — ул — һеҙҙең менән беҙ, беҙҙең эшләргә теләүе беҙ, беҙҙең яңыса эшләргә әҙер булыуыбыҙ, беҙҙең планды үтәргә ҡыйыулығыбыҙ».

Беҙҙең большевистик партияның һынап алынған етәкселегендә, һөйөклө юлбашсыбыҙ — бөйөк Сталиндең гениаль етәкселек итеүендә Башҡортостан хеҙмәтсәндәре Тыуған илдең был заданиеһын да намыҫ менән үтәрҙәр, тип беҙ ышанабыҙ.

Бөйөк Сталинсе Конституция байрағы аҫтында беҙҙең данлы социалистик Ватаныбыҙ йылдан-йыл, көндән-көн үҫә һәм нығый.

Сталинсе Конституция байрағы аҫтында беҙҙең эшселәрҙең, крәҫтиәндәрҙең һәм интеллигенцияның дуҫлығы нығый бара, совет обществоһының морально-политик берҙәмлеге. СССР халыҡтарының дуҫлығы нығый, Совет илебеҙ хәрәкәт иттереүсе ҡеүәтле көс — совет патриотизмы нығый.

Депутат иптәштәр!

Башҡорт АССР-ының Конституцияһы ҡабул ителгәндән бирле 10 йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Был йылдар эсендә беҙҙең государство системаһы государство ҡоролошоноң яңы тәжрибәһе менән байыны, үҫте һәм алға китте.

Ләкин общество һәм государство тормошо туҡтауһыҙ рәүештә алға бара. Конституцияға үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү кәрәклеге тыуҙыра.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы 1947 йылдың 17 мартында Редакцион комиссия төҙөне һәм уға Башҡорт АССР-ының Конституцияһы тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһындағы тәҡдимдәрҙе Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарамағына индерергә ҡушты.

1948 йылдың 13 мартында РСФСР Верховный Советы тарафынан РСФСР Конституцияһына (Төп Законына) үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында Закон ҡабул ителде. Был Законды ҡабул итеүҙән Башҡорт АССР-ы Конституцияһының тексына байтаҡ үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү кәрәклеге килеп сыға.

Бынан тыш, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Конституцияһының айырым статьяларына кәрәкле үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереүҙе талап итеүсе күп кенә законодательный актылар ҡабул итте.

Шуға ярашлы рәүештә, Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының (Төп Законының) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында тәҡдимдәр эшләне һәм уларҙы Верховный Совет ҡарамағына тапшыра.

Редакцион комиссияның тәҡдимдәре Верховный Совет депутаттарына таратылған Закон проектында яҙылған һәм ул түбәндәгеләрҙән тора:

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 14-се статьяһы Башҡорт АССР-ы Верховный Советының беренсе саҡырылыш өсөнсө Сессияһында ҡабул ителгән хәлдә хәрәкәт итә. Ул ваҡыттан алып административ-территориаль бүленештә яңы промышленность ҡалалары (Черниковск, Октябрьск һәм башҡалар) барлыҡҡа килеүҙән ғибарәт булған үҙгәрештәр булды. Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 14-се статьяһын хәҙерге административ-территориаль бүленеүгә ярашлы рәүештә килтерергә һәм районлар алфавит тәртибендә яңынан сығырға тәҡдим итә.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 30-сы статьяһына өҫтәмә индереү тураһында тәҡдим индерелә; был өҫтәмә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Башҡорт АССР-ының почетный исемдәрен билдәләүҙе күҙҙә тота. Был өҫтәмә Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының үҙ йыл эсендәге практик эшмәкәрлеген иҫәпкә алыуҙан килеп сыға.

Башҡорт АССР-ының Верховный Советы 1947 йылдың 17 мартында «Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының һан составы тураһында» закон ҡабул иткәйне. Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 28-се статьяһына ярашлы рәүештә, Башҡорт АССР-ы Верховный Советының Президиумы Председатель, Председателдең ике урынбаҫары, Секретарь һәм Президиумдың 15 члены составында һайланырға тейешле. Верховный Совет Президиумы ошондай составта эшләп килде, ләкин, тәжрибә күрһәткәнсә, Президиум члендәре ошондай күп һанда булғанда, уларҙың күбеһе Өфө ҡалаһынан ситтә эшләгәнлектән Президиум ултырышын регуляр рәүештә йыйнау ҡыйын. Ә шул уҡ ваҡытта хәҙерге шарттарҙа регуляр коллектив эш бигерәк тә кәрәк.

Ошо законға ярашлы рәүештә, Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 28-се статьяһына тейешле үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итә. Был үҙгәреш шунан тора, Президиум члендәре 15 урынына 11 итеп билдәләнә.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 36-сы статьяһында яңы һайланған Верховный Советты саҡырыу срогын үҙгәртеү һәм яңы һайланған Верховный Совет һайлауҙарҙан һуң ес айҙан да һуңламай Верховный Совет Президиумы тарафынан саҡырыла тип билдәләргә тәҡдим ителә.

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы булған көндән алып государство власенең юғары башҡарма һәм бойороҡ биреүсе органдары Халыҡ Комиссарҙары Советы тип аталып йөрөтөлдө, ә государство идараһының тармаҡтарына етәкселек итеүсе үҙәк органдар — Халыҡ Комиссариаттары тип аталып йөрөтөлдө. 30 йылдан артыҡ ваҡыт үтте. Беҙҙең государствобыҙ бөйөк держава булып әүерелде, үҙенең функциялары буйынса ла, формалары буйынса ла үҙгәрҙе, Сталинсе Конституция башланғыстарында ҡоролған Совет государство системаһы тамам нығыны. Совет государствоһының ҡайһы бер органдарының иҫке исемдәре Конституция тарафынан был органдарға йөкмәтелгән бурыстарҙың һәм яуаплылыҡтың яңы күләмен етерлек дәрәжәлә тулы һәм аныҡ аңлатырлыҡ түгелдәр, иҫкерҙеләр. Шуны иҫәпкә алып һәм тейешле государство органдарының дөйөм ҡабул ителгән исемдәрен иҫәпкә алып, СССР Верховный Советы 1946 йылдың 15 мартында Халыҡ Комиссарҙары Советын — Министрҙар Советы тип, ә Халыҡ Комиссариаттарын — Министерстволар тип атау тураһында Закон ҡабул итте.

Ошо үҙгәрештәргә ярашлы рәүештә Редакцион комиссия 20, 30, 37—48, 64, 65, 68, 69 һәм 81-се статьяларҙағы «Халыҡ Комиссарҙары Советы», «Халыҡ Комиссариаты» һәм «Халыҡ Комиссары» тигән һүҙҙәрҙе тейешле рәүештә «Министрҙар Советы», «Министерство» һәм «Министр» тигән һүҙҙәр менән алмаштырырға тәҡдим итә.

СССР Верховный Советы 1946 йылдың 19 мартында «СССР прокурорына СССР-ҙың генеральный прокуроры тигән исем биреү тураһында» Закон ҡабул иткәйне. Ошо Законға, СССР Конституцияһына һәм РСФСР Конституцияһына ярашлы рәүештә Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 81, 82, 83 һәм 84-се статьяларына тейешле үҙгәрештәр индерергә тәҡдим итә.

Статья 44. Министрҙарҙың һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы составына инеүсе управлениеләр начальниктарының исемлеген Башҡорт АССР-ы Министерстволары һәм управлениелары составында булған үҙгәрештәргә ярашлы итергә һәм алфавит тәртибендә яҙырға.

(Дауамы икенсе биттә).

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр индереү тураһында

Редакцион комиссия Председателе депутат Ғ. Ф. Шафиков докалады

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

Бынан башҡа, 44-се статьяла Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы составына инеүсе управлениелар начальниктарының тәҙмәһенә хәрәкәт итеүсе законсыҙлыҡҡа ярашлы рәүештә кинофикация управлениеһе начальнигын һәм культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһе начальнигын индерергә тәҡдим ителә.

63, 64 һәм 66-сы статьяларҙа хеҙмәтсәндәр депутаттарының район һәм ҡала Советтәре башҡарма комитеттәре бүлектәренең тәҙмәһе бирелә. Башҡарма комитеттәрҙең яңы бүлеге — культура-ағартыу эштәре бүлеген төҙөү һәм ер эштәре бүлегенең ауыл хужалығы бүлегенә әйләндерелеүе айҡанлы, был статьяларҙың бүлектәрҙе алфавит тәртибендә яҙылған яңы редакцияһы тәҡдим ителә.

Закон проекты буйынса 66, 67 һәм 68-се статьяларҙың редакцияһы 63, 64 һәм 66-сы статьяларға ярашлы рәүештә үҙгәртелде. Йәғни был статьяларҙа «Советтәрҙең бүлеге» тигән һүҙ урынына «башҡарма комитеттәрҙең бүлектәре» тигән берҙәм исем бирелә.

68-се статьяға «Черниковск» һәм «Октябрьск» тигән һүҙҙәрҙе өҫтәргә.

ВЦСПС-тың тәҡдиме айҡанлы СССР Верховный Советы Президиумы тарафынан 1940 йылдың 26 июнендә 8 сәғәтлек эш көнөнә күсеү тураһында Указ ҡабул ителде. Быны совет халҡының һәм государствоһының интересттәре талап итте. Эш көнөн 8 сәғәткә тиклем оҙайтҡандан һуң да СССР-ҙа эш көнө әлеккесә бөтә донъяла иң ҡыҫҡа эш көнө булып ҡалды.

Һуғыштан һуңғы тыныс төҙөлештә совет халҡы һәм государство алдында торған бурыстар эш ваҡытының йәшәп килгән режимен һаҡлап ҡалдырыуҙы талап итәләр.

РСФСР Верховный Советының 1948 йыл 13 март Законы тарафынан РСФСР Конституцияһының 123-сө статьяһына 8 сәғәтлек эш көнөнә күсеүгә сағылдырған үҙгәреш индерелде.

Шуға ярашлы рәүештә Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 86-сы статьяһын түбәндәге редакцияла яҙырға:

«86 статья. Башҡорт АССР-ы граждандарының ял итеүгә хоҡуҡы бар.

Ял итеүгә хоҡуҡ эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн һигеҙ сәғәтлек эш көнө билдәләү менән һәм эш шарттары ауыр булған ҡайһы бер профессиялар өсөн эш көнөн ете һәм алты сәғәткә тиклем һәм эш шарттары айырыуса ауыр булған цехтарҙа — 4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыу менән; эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын һаҡлап йыл һайын отпуск бирелеүе менән; хеҙмәтсәндәргә хеҙмәтләндереү өсөн санаторийҙар, ял йорттары, клубтарҙың киң селтәрен биреү менән тәьмин ителә».

Сталинсе Конституция СССР-ҙың бөтә граждандарына белем алыуға хоҡуҡ бирә.

Тулы булмаған урта белем алыу буйынса расходтарҙы государство тотошо менән үҙ өҫтөнә алды. Урта мәктәптәрҙең өлкән класстарында һәм юғары мәктәптә уҡыу өсөн алынған түләү менән государстволың халыҡ мәғарифенә тотҡан расходтарының бик аҙ ғына өлөшө ҡапланды. Башҡорт АССР-ының 1948 йылға булған бюджеты буйынса халыҡ мәғарифенә 503.322 мең һум бүлеп бирелде, был, республиканың бөтә расходтарының 57,5 проценте самаһын тәшкил итә.

Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 88-се статьяһының икенсе өлөшөн РСФСР Конституцияһының 125-се статьяһына тура килтерергә һәм статьяны түбәндәге редакцияла яҙырға тәҡдим итә:

«88 Статья. Башҡорт АССР-ы граждандарының белем алыуға хоҡуҡы бар.

Был хоҡуҡ дөйөм мәжбүри башланғыс белем алыу менән, ете йыллыҡ белем алыуҙың түләүһеҙ булыуы менән, юғары мәктәптә отличие күрһәткән уҡыусыларға государство стипендиялары системаһы менән, мәктәптәрҙә туған телдә уҡытыу менән, заводтарҙа, совхоздарҙа, машина-трактор станцияларында һәм колхоздарҙа хеҙмәтсәндәрҙе производство, техника һәм агрономия белемдәренә түләүһеҙ өйрәтеүҙе ойоштороу менән тәьмин ителә».

Редакцион комиссия, РСФСР Конституцияһының 126-сы статьяһына ярашлы рәүештә, Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 89-сы статьяһында ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙҙәренә бирелгән хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу мөмкинлегенең шулай уҡ күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә государство ярҙамы менән тәьмин ителеүе тураһында күрһәтергә тәҡдим итә. Был өҫтәмә йәшәп килеүсе закондан килеп тыуа һәм әсәлекте, балалыҡты һаҡлау тураһында Совет государствоһының хәстәрлегән кәүҙәләндерә. Тик беҙҙең Башҡорт АССР-ында ғына 1947 йыл эсендә күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә 92.784.200 һум государство пособиеһе түләнде.

РСФСР Конституцияһының 139-сы статьяһына тулыһынса ярашлы рәүештә, Закон проектында Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 102-се статьяһына Башҡорт АССР-ы Верховный Советына һайлана торған граждандар өсөн йәш цензын 21 йәштән билдәләүсе икенсе өлөш өҫтәү күҙҙә тотолған.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһының тексына юғарыла күрһәтелгән үҙгәрештәрҙән һәм өҫтәмәләрҙән тыш, Редакцион комиссия Башҡорт АССР-ы Конституцияһының 18, 20, 42, 53, 54, 99, 105 һәм 108-се статьяларына түбәндәге үҙгәрештәрҙе индерергә тәҡдим итә:

105-се статьяла «Ҡыҙыл Армияла» тигән һүҙҙәрҙе «СССР-ҙың Ҡораллы Көстәрендә» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

108-се статьяла «Өфө ҡалаһының ҡала Советы» тигән һүҙҙәрҙе «Өфө һәм Черниковск ҡалаларының ҡала Советтары» тигән һүҙҙәр менән.

Башҡорт АССР-ы Конституцияһы текстына үҙгәрештәр һәм өҫтәмәләр тураһында Редакцион комиссиябыҙ тәҡдимдәре ошолар һәм улар Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарамағына һеҙҙең раҫлауығыҙға индерелә.

Депутат иптәштәр!

Башҡорт АССР-ы Конституцияһы ҡабул ителгән көндән алып үткән йылдар эсендә беҙҙең халҡыбыҙ Сталинсе Конституция яҡтыһында, большевиктар партияһы һәм иптәш Сталин юлбашсылығында хужалыҡ һәм культура төҙөлешендә, социалистик государствобыҙҙы нығытыуҙа ҙур уңыштарға өлгәште.

Совет общественный һәм государство ҡоролошо тыныс төҙөлеш йылдарында булһын, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ла үҙенең еңелмәҫ көслөлеген һәм йәшәүсәнлеген иҫбат итте.

Бөйөк Сталинсе Конституция байрағы менән рухландырылған, хеҙмәттә һәм көрәштә һыналған коммунистар партияһы етәкселегендә, үҙенең һөйөклө юлбашсыһы иптәш Сталин юлбашсылығында Башҡортостан халыҡтары үҙҙәренең данлы эштәре менән Советтар Союзы халыҡтары семьяһында үҙҙәренең республикаһы өсөн почетлы урын яулап алырҙар һәм Тыуған илде [illegible] менән [illegible] мөмкин.

Ярты йылын заданиеләрҙе арттырып үтәнеләр

Башметаллсоюз системаһына ҡараған артелдәрҙең коллективтары йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәү өсөн көрәшәләр. Маҡтаулы ярышта Черниковскиҙағы 1 Май исемендәге артель (председателе иптәш Шабанов) алғы сафта бара. Ул инде 9 айлыҡ планды үтәне. Артель ағымдағы йылда 1 миллион 400 мең һумлыҡ һәр төрлө һауыт-һаба, йорт өсөн кәрәк нәмәләр эшләп сығарҙы. Хеҙмәт [illegible] 14 процентҡа кәметелде. Стахановсы иптәш Романов һауыт-һабаларҙы ҡойоуҙа яңы рационализация методы ҡулланып, хеҙмәт етештереүсәнлеген [illegible] арттырҙы.

Өфөләге «Металлист» артеле (председателе Ребяков), металл штамплау заводы коллективтары производство пландарын үтәүҙә яҡшы өлгө күрһәтәләр. Штамплау заводы үҙенең ярты йыллыҡ планын 117 процентҡа үтәне. 5 миллион 250 мең һумлыҡ һәр төрлө киң ҡулланыу тауарҙары эшләп сығарҙы.

Металлсоюз системаһында бөтәһе 11 артель ярты йыллыҡ планды арттырып үтәне.

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының 1948 йылға бюджете тураһында Закон

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы **ҡарар итә:**

1. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы тарафынан индерелгән Башҡорт АССР-ының 1948 йылға бюджетын доходтар һәм расходтар буйынса 876.355 мең һум суммала раҫларға һәм, бынан тыш, бюджеттең айырым маҡсаттарға билдәләнгән резервын индереп, 1949 йылдың 1 ғинуарына бюджет средстволарының күсә торған 32.920 мең һум суммаһындағы ҡалдыҡтарын раҫларға.

2. Ошо Законның 1-се статьяһына ярашлы рәүештә Башҡорт АССР-ының республикан бюджетен доходтар һәм расходтар буйынса 276.933 мең һум суммаһында раҫларға һәм бынан тыш 1949 йылдың 1 ғинуарына бюджет средстволарының күсә торған ҡалдыҡтарын 6.839 мең һум суммаһында раҫларға.

3. 1948 йылға райондарҙың һәм ҡалаларҙың бюджеттәрен һәм, бюджеттең айырым маҡсаттарға билдәләнгән резервын индереп, 1949 йылдың 1 ғинуарына бюджет средстволарының күсә торған ҡалдыҡтарын түбәндәге күләмдәрҙә раҫларға:

(Мең һумдарҙа)

	Райондар һәм ҡалалар исемдәре	Доходтар һәм расходтар буйынса бюджеттең күләме	1949 йылдың 1 ғинуарына күсә торған ҡалдыҡтар
1	Абҙан	3693	236
2	Әбйәлил	5732	289
3	Әлшәй	9976	490
4	Архангель	6131	304
5	Асҡын	7018	349
6	Ауырғаҙы	8726	432
7	Байҡыбаш	5170	259
8	Баймаҡ	12840	645
9	Баҡалы	8001	398
10	Балтач	7232	361
11	Бәләбәй	14691	626
12	Белоҡатай	5930	299
13	Белорет	10848	527
14	Бишбүләк	7234	364
15	Бөрө	15035	633
16	Благовар	6609	381
17	Благовещен	7032	351
18	Бүздәк	7327	372
19	Бөҙәйәҙ	6129	306
20	Борай	8339	415
21	Бөрйән	3370	363
22	Воскресен	3901	195
23	Ғафури	10108	501
24	Дәүләкән	10831	513
25	Дыуан	6528	321
26	Дүртөйлө	8725	436
27	Йәрмәкәй	6731	332
28	Йылайыр	4846	292
29	Зианчура	3606	231
30	Иглин	7833	391
31	Илеш	8190	459
32	Ҡалтасы	6370	318
33	Ҡандра	5526	276
34	Ҡариҙел	5977	296
35	Ҡырмыҫҡалы	7015	347
36	Ҡыйғы	5014	252
37	Краснокам	5868	291
38	Күгәрсен	6263	314
39	Кушнаренко	8019	401
40	Көйөргәҙе	6376	313
41	Маҡар	7140	444
42	Матрай	3811	188
43	Мәләүез	7301	319
44	Мәсетле	5433	280
45	Мишкә	6624	330
46	Миәкә	7418	368
47	Нуриман	7630	376
48	Покровка	4210	213
49	Салауат	6055	306
50	Стәрлебаш	5882	293
51	Стәрлетамаҡ	9098	445
52	Тәтешле	5637	281
53	Туймазы	9427	475
54	Оло-Тиләк	5002	251
55	Өфө	7432	366
56	Учалы	9197	473
57	Федоровка	5597	280
58	Хәйбулла	5957	303
59	Саҡмағош	7880	393
60	Шишмә	8820	435
61	Шаран	7147	369
62	Йомағужа	5102	254
63	Яңауыл	9334	459
64	Белорет ҡалаһы	15268	363
65	Ишембай ҡалаһы	9129	232
66	Стәрлетамаҡ ҡалаһы	14964	360
67	Өфө ҡалаһы	76366	1509
68	Черниковск ҡалаһы	27720	648
69	Октябрьск ҡалаһы	6366	189

4. Райондарҙың һәм республикан буйһоноуындағы ҡалаларҙың бюджеттәренә дөйөм союз государство налогтарынан һәм доходтарынан 1948 йылға отчисление-ләрҙе түбәндәге күләмдәрҙә билдәләргә: **(Процентарҙа)**

Тәртип номеры	Районлар һәм ҡалалар исемдәре	Оборот налогынан	Тауар операцияларынан булып киткән налогтан	Колхоздарҙан йыйылған доходный налогтан	Халыҡтан йыйылған подоходный налогтан	Ауыл хужалығы налогынан	Бүйҙаҡ һәм аҙ семьялы граждандарҙан йыйылған налогтан	Айырым хужалыҡтарҙан йыйылған налогтан	Государство заемы	МТС-тарҙан йыйылған доходтан
1	Абҙан	100	100	35	100	35	80	50	80	35
2	Әбйәлил	88	100	35	80	35	80	50	80	35
3	Әлшәй	6,8	100	35	80	25	80	50	80	35
4	Архангель	43	100	35	80	20	80	50	80	35
5	Асҡын	46	100	35	80	35	80	50	80	35
6	Ауырғаҙы	61	100	35	80	20	80	50	80	35
7	Баҡалы	34	100	35	80	25	80	50	80	35
8	Балтач	63	100	35	80	20	80	50	80	35
9	Байҡыбаш	51	100	35	80	20	80	50	80	35
10	Баймаҡ	17,8	100	35	80	35	80	50	80	35
11	Бәләбәй	11,8	100	35	80	35	80	50	80	35
12	Белоҡатай	32	100	35	80	25	80	50	80	35
13	Белорет	1,1	100	35	10	25	30	50	10	35
14	Бишбүләк	78	100	35	80	25	80	50	80	35
15	Бөрө	4,7	100	35	80	35	80	50	80	35
16	Благовар	58	100	35	80	25	80	50	80	35
17	Благовещен	8	100	35	80	35	80	50	80	35
18	Бүздәк	41	100	35	80	25	80	50	80	35
19	Бөҙәйәҙ	68	100	35	80	35	80	50	80	85
20	Борай	44	100	35	80	35	80	50	80	35
21	Бөрйән	100	100	35	100	35	80	50	80	35
22	Воскресен	40	100	35	100	35	80	50	80	35
23	Ғафури	31	100	35	80	35	80	50	80	35
24	Дәүләкән	5,3	100	35	80	35	80	50	80	35
25	Дыуан	26	100	35	80	25	80	50	80	35
26	Дүртөйлө	34	100	35	80	35	80	50	80	35
27	Йәрмәкәй	89	100	35	80	20	80	50	80	35
28	Йылайыр	57	100	35	80	25	80	50	80	35
29	Зианчура	100	100	35	100	35	80	50	80	35
30	Иглин	30	100	35	80	20	80	50	80	35
31	Илеш	60	100	35	80	35	80	50	80	35
32	Ҡалтасы	50	100	35	80	35	80	50	80	35
33	Ҡандра	55	100	35	80	25	80	50	80	35
34	Ҡариҙел	25	100	35	80	35	80	50	80	35
35	Ҡырмыҫҡалы	55	100	35	80	20	80	50	80	35
36	Ҡыйғы	31	100	35	80	25	80	50	80	35
37	Краснокам	38	100	35	80	35	80	50	80	35
38	Күгәрсен	45	100	35	80	35	80	50	80	35
39	Кушнаренко	37	100	35	80	25	80	50	80	35
40	Көйөргәҙе	38	100	35	100	20	80	50	80	35
41	Маҡар	51	100	35	80	25	80	50	80	35
42	Матрай	100	100	35	100	35	80	50	80	35
43	Мәләүез	13	100	35	80	35	80	50	80	35
44	Мәсетле	55	100	35	80	25	80	50	80	35
45	Мишкә	73	100	35	80	35	80	50	80	35
46	Миәкә	90	100	35	80	25	80	50	80	35
47	Нуриман	74	100	35	80	35	80	50	80	35
48	Покровка	35	100	35	100	35	80	50	80	35
49	Салауат	97	100	35	100	35	80	50	80	35
50	Стәрлебаш	61	100	35	100	20	80	50	80	35
51	Стәрлетамаҡ	1,4	100	35	10	25	40	50	10	35
52	Тәтешле	76	100	35	80	35	80	50	80	35
53	Туймазы	1,6	100	35	80	35	80	50	80	35
54	Оло-Тиләк	48	100	35	80	35	80	50	80	35
55	Өфө	13	100	35	80	25	80	50	80	35
56	Учалы	45	100	35	80	35	80	50	80	35
57	Федоровка	58	100	35	100	20	80	50	80	35
58	Хәйбулла	31	100	35	80	35	80	50	80	35
59	Саҡмағош	62	100	35	80	35	80	50	80	35
60	Шишмә	25,5	100	35	80	25	80	50	80	35
61	Шаран	47	100	35	80	35	80	50	80	35
62	Йомағужа	100	100	35	100	35	80	50	80	35
63	Яңауыл	6,5	100	35	80	35	80	50	80	35
64	Белорет ҡалаһы	1,5	100	—	10	—	30	—	10	—
65	Ишембай ҡалаһы	1,8	100	—	20	—	80	—	20	—
66	Стәрлетамаҡ ҡалаһы	1,4	100	—	10	—	40	—	10	—
67	Өфө ҡалаһы	4,8	100	—	20	—	40	—	20	—
68	Черниковск ҡалаһы	3,5	100	—	10	—	40	—	10	—
69	Октябрьск ҡалаһы	4	100	—	10	—	40	—	10	—

5. Башҡорт АССР-ының 1947 йылға бюджете үтәлеше тураһындағы отчетты расходтарға ҡарағанда доходтарҙы 45.107 мең һумға арттырып, доходтар буйынса 887.050 мең һум һәм расходтар буйынса — 841.943 мең һум суммаһында раҫларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре Ә. БИКТИМЕРОВ.

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр тураһында З а к о н

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы Башҡорт АССР-ы Конституцияһының тексына түбәндәге үҙгәртеүҙәрҙе һәм өҫтәмәләрҙе индерергә **ҡарар итә:**

1. Башҡорт АССР-ының административ-территориаль бүленешендә үткәрелгән үҙгәрештәргә бәйләнешле рәүештә 14-се статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«14 СТАТЬЯ. Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы түбәндәге райондарҙан тора: Абҙан, Әбйәлил, Әлшәй, Архангель, Асҡын, Ауырғаҙы, Байҡыбаш, Баймаҡ, Баҡалы, Балтач, Бәләбәй, Белоҡатай, Белорет, Бишбүләк, Бөрө, Благовар, Благовещен, Бүздәк, Бөҙәйәҙ, Борай, Бөрйән, Воскресен, Ғафури, Дәүләкән, Дыуан, Дүртөйлө, Йәрмәкәй, Зианчура, Йылайыр, Иглин, Илеш, Ҡалтасы, Ҡандра, Ҡариҙел, Ҡырмыҫҡалы, Ҡыйғы, Краснокам, Күгәрсен, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Маҡар, Матрай, Мәләүез, Мәсетле, Мишкә, Миәкә, Нуриман, Покровка, Салауат, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ, Тәтешле, Туймазы, Оло-Тиләк, Өфө, Учалы, Федоровка, Хәйбулла, Саҡмағош, Шишмә, Шаран, Йомағужа, Яңауыл, һәм Башҡорт АССР-ының юғары государственный органдарына туранан-тура буйһонған Өфө, Черниковск, Ишембай, Белорет, Стәрлетамаҡ һәм Октябрьск ҡалаларынан тора».

2. 18-се статьяла икенсе өлөшөндә «власть органдары» тигән һүҙҙәрҙе «государство власы органдары» тигән һүҙҙәр менән; «а» пунктында «башҡарылыуына» тигән һүҙҙе «һаҡланыуына» тигән һүҙ менән алыштырырға; «е» пунктын «һәм уның үтәлеше тураһында отчетты» тигән һүҙҙәр менән тулыландырырға.

3. 20-се статьяла «Халыҡ Комиссарҙары Советы» һәм «Халыҡ Комиссариаттары» тигән һүҙҙәрҙе ярашлы рәүештә «Министрҙар Советы» һәм «Министерстволар» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

4. 28-се статьяла «Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе, уның ике урынбаҫары, Президиум секретаре һәм Президиумдың 15 члены» тигән һүҙҙәрҙе «Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Председателе, председателдең ике урынбаҫары, Президиум секретаре һәм ун бер члены» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

5. 30-сы статьяла «г» һәм «д» пункттарындағы «Халыҡ Комиссарҙары Советының», «Халыҡ Комиссарҙарын», «Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателенең» һүҙҙәрен ярашлы рәүештә «Министрҙар Советының», «Министрҙарын», «Министрҙар Советы Председателенең» һүҙҙәре менән алыштырырға: 30-сы статьяны ошондай йөкмәткеле пункт менән тулыландырырға: «Башҡорт АССР-ының почетлы исемдәрен билдәләй»;

Шуға ярашлы рәүештә 30-сы статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«30 СТАТЬЯ. Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы:

а) Башҡорт АССР-ы Верховный Советының сессияларын саҡыра;

б) Указдар сығара;

в) Башҡорт АССР-ы Закондарына аңлатмалар бирә;

г) бөтә халыҡтан һорау (референдум) үткәрә;

д) Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советының ҡарарҙарын һәм бойороҡтарын, а шулай уҡ Башҡорт АССР-ы хеҙмәтсәндәр депутаттарының район һәм ҡала Советтәре ҡарарҙарын һәм бойороҡтарын, законға ярашлы булмаған ваҡиғаларҙа, уларҙы юҡҡа сығара;

е) Башҡорт АССР-ы Верховный Советы сессиялары араһындағы осорҙа, Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең тапшырыуы буйынса, Башҡорт АССР-ы Верховный Советының артабан раҫлауы менән, Башҡорт АССР-ының айырым министрҙарын эштән бушата һәм эшкә тәғәйенләй;

ж) Башҡорт АССР-ының почетлы исемдәрен билдәләй;

з) Башҡорт АССР-ының почетлы исемдәрен бирә».

6. 36-сы статьяла «һайлаусыларҙан һуң ике айҙан да һуңламайынса» тигән һүҙҙәрҙе «һайлауҙарҙан һуң өс айҙан да һуңламайынса» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

7. 37, 38, 39, 40, 41, 42 һәм 43-сө статьяларҙа «Халыҡ Комиссарҙары Советы», «Халыҡ Комиссариаттарының», «Халыҡ Комиссарҙары» һүҙҙәрен ярашлы рәүештә «Министрҙар Советы», «Министерстволар», «Министрҙәре» һүҙҙәре менән алыштырырға; 42-се статьялағы «в» пунктынан «хужалыҡ һәм культура» һүҙҙәрен алып ташларға.

8. 44-се статьяла: «Халыҡ Комиссарҙары Советы», «Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателе», «Халыҡ Комиссарҙары Советы Председателенең урынбаҫарҙары», һәм «Халыҡ Комиссарҙары» һүҙҙәрен ярашлы рәүештә «Министрҙар Советы», «Министрҙар Советы Председателе», «Министрҙар Советы Председателе урынбаҫарҙары» һәм «Министрҙар» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

Министрҙар һәм Управлениелар начальниктарының тәҙмәһен Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге Министерстволар һәм Управлениелар составындағы үҙгәрештәргә ярашлы рәүештә үҙгәртергә.

Шуға ярашлы рәүештә 44-се статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«44 СТАТЬЯ. Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Башҡорт АССР-ы Верховный Советы тарафынан түбәндәге составта төҙөлә:

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателе;

(Аҙағы 3-сө биттә).

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Конституцияһы (Төп Законы) тексына үҙгәртеүҙәр һәм өҫтәмәләр тураһында З а к о н

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫарҙары;
Башҡорт АССР-ы Государство план комиссияһы председателе;
Башҡорт АССР-ы Министрҙәре:
Эске эштәр;
Государство иминселеге;
Һаулыҡ һаҡлау;
Коммуналь хужалыҡ;
Еңел промышленность;
Урман промышленносе;
Урындағы промышленность;
Аҙыҡ промышленносе;
Мәғариф;
Ауыл хужалығы;
Социаль тәьминәт;
Сауҙа;
Финанс;
Юстиция;
Управлениелар начальниктәре:
Автомобиль транспорты;
Юл;
Кинофикация;
Урындағы яғыулыҡ промышленносе;
Төҙөү материалдары промышленносе;
Искусство эштәре буйынса;
Культура-ағартыу учреждениелары эштәре буйынса».

9. 45, 46, 47, 48-се статьяларҙы «Халҡ Комиссары», «Халҡ Комиссарҙары», «Халҡ Комиссариаттарын», «Халҡ Комиссариаттары», «Халҡ Комиссарҙары Советы» һәм «Халҡ Комиссарҙары Советына» тигән һүҙҙәрҙе ярашлы рәүештә «Министр», «Министрҙәр», «Министерстволар», «Министерство», «Министрҙәр Советы» һәм «Министрҙәр Советына» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға; ...-сы статьяла «РСФСР һәм Башҡортостан АССР-ы Конституцияларына ярашлы рәүештә» тигән һүҙҙәрҙе «РСФСР Конституцияһына һәм Башҡорт АССР-ы Конституцияһына ярашлы рәүештә» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

10. 53-сө статьялағы «уның урынбаҫарҙары» тигән һүҙҙәрҙе «председателдең урынбаҫарҙары» тигән һүҙҙәр менән; 54-се статьялағы «уның урынбаҫары» тигән һүҙҙәрҙе «председателдең урынбаҫары» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

11. 63-сө статьялағы бүлектәрҙең теҙмәһен хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре башҡарма комитеттәре бүлектәре составындағы үҙгәрештәргә ярашлы рәүештә итеп, статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«63 СТАТЬЯ. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре башҡарма комитеттәренең түбәндәге бүлектәрен төҙөләр:
юл;
һаулыҡ һаҡлау;
культура-ағартыу эштәре;
халҡ мәғарифе;
дөйөм бүлек;
ауыл хужалығы;
социаль тәьминәт;
сауҙа;
финанс;
план комиссияһы;
Башҡарма комитет председателе эргәһендә кадрҙар секторы һәм, бынан тыш, район хужалығының үҙенсәлектәренә ярашлы рәүештә, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы рәҫләүе менән, хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре түбәндәге бүлектәрҙе төҙөләр:
коммуналь;
урындағы промышленность».

12. 64-се статьяла «Халҡ Комиссариаты» һүҙен «Министерство» тигән һүҙ менән, «управлениелар» һүҙен «бүлектәр» тигән һүҙ менән алыштырырға һәм статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«64 СТАТЬЯ. Район шарттарына ярашлы рәүештә, СССР һәм РСФСР Закондары нигеҙендә, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы рәҫләүе менән, Эске эштәр Министерствоһы һәм государство иминселеге Министерствоһы хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советтәре эргәһендә үҙҙәренең бүлектәрен төҙөләр».

13. 65-се статьяла «Район Советтәре бүлектәре» һүҙҙәрен «Район Советтәренең башҡарма комитеттәре бүлектәре» тигән һүҙҙәр менән; «Халҡ Комиссариатына» һүҙҙәрен «Министерствоһына» тигән һүҙ менән алыштырырға.

14. 66-сы статьялағы «түбәндәге» һүҙен «түбәндә күрһәтелгән» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға, бүлектәр теҙмәһен хеҙмәтсәндәр депутаттары ҡала Советтәренең башҡарма комитеттәре бүлектәре составындағы үҙгәрештәргә ярашлы итеп, статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«66 СТАТЬЯ. Хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советтәре башҡарма комитеттәрҙең түбәндә күрһәтелгән бүлектәрен төҙөйҙәр.
һаулыҡ һаҡлау;
коммуналь хужалыҡ;
культура-ағартыу эштәре;
халҡ мәғарифе;
дөйөм бүлек;
социаль тәьминәт;
сауҙа;
финанс;
план комиссияһы;
Башҡарма комитете председателе эргәһендә кадрҙар секторы һәм, бынан тыш, ҡала промышленносенең, уның ҡала һәм ҡала яҡы хужалығының үҙенсәлегенә ярашлы рәүештә:
урындағы промышленность;
ауыл хужалығы бүлеге».

15. 67-се статьяла «Ҡала Советтәренең бүлектәре» һүҙҙәрен «Ҡала Советтәре башҡарма комитеттәренең бүлектәре» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға; «Район Советенең тейешле бүлегенә» һүҙҙәрен «Район Советы башҡарма комитетенең тейешле бүлегенә» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

16. 68-се статьяла «ҡала Советтәренең бүлектәре» һүҙҙәрен «Ҡала Советтәре башҡарма комитеттәренең бүлектәре» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға; «Халҡ Комиссариатына» һүҙҙәрен «Министерствоһына» тигән һүҙ менән алыштырырға.

Ҡалалар теҙмәһен республикаға буйһонған ҡалалар составындағы үҙгәрештәргә ярашлы рәүештә яҙырға.

Шуға ярашлы рәүештә 68-се статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«68 СТАТЬЯ. Өфө, Черниковск, Ишембай, Белорет, Стәрлетамаҡ һәм Октябрьск хеҙмәтсәндәр депутаттары ҡала Советтәренең башҡарма комитеттәре бүлектәре үҙҙәренең эшмәкәрлегендә хеҙмәтсәндәр депутаттарының ҡала Советтәренә һәм уның башҡарма комитетенә шулай уҡ Башҡорт АССР-ының тейешле Министерствоһына ла туранан-тура буйһоналар».

17. 69-сы статьяла «Халҡ Комиссарҙары Советы» һүҙҙәрен «Министрҙәр Советы» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

18. 81, 82, 83, 84-се статьяларҙа «Халҡ Комиссариаттары», «СССР Прокуроры», «СССР-ҙың Прокурорының», «СССР һәм РСФСР Прокурорына» һүҙҙәрен ярашлы рәүештә «Министерстволар», «СССР-ҙың Генеральный Прокуроры», «СССР-ҙың Генеральный Прокурорының», СССР-ҙың Генеральный Прокурорына һәм РСФСР Прокурорына» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

19. 86-сы статьялағы «эшселәрҙең ҙур күпселеге өсөн эш көнөн 7 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыу менән» һүҙҙәрен «эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн һигеҙ сәғәтлек эш көнө билдәләү һәм эш шарттары ауыр булған ҡайһы бер профессиялар өсөн эш көнөн ете һәм алты сәғәткә тиклем һәм эш шарттары айырыуса ауыр булған цехтарҙа — 4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыу менән» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

Шуға ярашлы рәүештә 86-сы статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«86 СТАТЬЯ. Башҡорт АССР-ы граждандарының ял итеүгә хоҡуҡы бар.

Ял итеүгә хоҡуҡ эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр өсөн һигеҙ сәғәтлек эш көнө билдәләү менән һәм эш шарттары ауыр булған ҡайһы бер профессиялар өсөн эш көнөн ете һәм алты сәғәткә тиклем һәм эш шарттары айырыуса ауыр булған цехтарҙа — 4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыу менән; эшселәргә һәм хеҙмәткәрҙәргә эш хаҡын һаҡлап, йыл һайын, отпускалар билдәләү менән; хеҙмәтсәндәргә хеҙмәтләндереү өсөн санаторийҙар, ял йорттары, клубтарҙың киң селтәрен биреү менән тәьмин ителә».

20. 88-се статьяла «Белем алыуҙың түләүһеҙ булыуы менән» һүҙҙәрен «ете йыллыҡ белем алыуҙың түләүһеҙ булыуы менән» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға; «юғары белем алыуҙы ла индереп», һәм «уҡыусыларҙың ҙур күпселегенә» һүҙҙәрен сығарып ташларға; «государство стипендиялары» тигән һүҙҙәр алдына «яҡшы өлгәрешле уҡыусыларға» тигән һүҙҙәрҙе ҡушырға.

Шуға ярашлы рәүештә 88-се статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«88 СТАТЬЯ Башҡорт АССР-ы граждандарының белем алыуға хоҡуҡы бар.

Был хоҡуҡ дөйөм-башланғыс белем алыу менән, ете йыллыҡ белем алыуҙың түләүһеҙ булыуы менән, юғары мәктәптә отличие күрһәткән уҡыусыларға государство стипендиялары системаһы менән, мәктәптәрҙә туған телдә уҡытыу менән, заводтарҙа, совхоздарҙа, машина-трактор станцияларында һәм колхоздарҙа хеҙмәтсәндәрҙе производство, техника һәм агрономия белемдәренә түләүһеҙ өйрәтеүҙе ойоштороу менән тәьмин ителә».

21. 89-сы статьяның икенсе өлөшөндә «әсә һәм баланың интерестәре государство тарафынан һаҡланыу менән» һүҙҙәренән һуң «күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә государство ярҙамы менән», тигән һүҙҙәрен ҡушырға.

Шуға ярашлы рәүештә 80-се статьяны түбәндәгесә яҙырға:

«89 СТАТЬЯ. Башҡорт АССР-ында хужалыҡ, государство, культура һәм общественный-политик тормоштоң бөтә өлкәләрендә ҡатын-ҡыҙға ирҙәр менән тиң хоҡуҡтар бирелә.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың был хоҡуҡтарын тормошҡа ашырыу мөмкинлеге ҡатын-ҡыҙға хеҙмәт, хеҙмәт хаҡы алыу, ял итеү, социаль страхование һәм белем алыуға ирҙәр менән тиң хоҡуҡ биреләү менән, әсә һәм баланың интерестәре государство тарафынан һаҡланыу менән, күп балалы һәм яңғыҙ әсәләргә государство ярҙамы менән, йөклө булғанда ҡатындарға эш хаҡтарын һаҡлап, отпускалар биреү менән бала тыуҙырыу йорттарының, балалар йәслеләренең һәм баҡсаларының киң селтәре менән тәьмин ителә».

22. 99-сы статьяла «Эшсе-Крәҫтиән Ҡыҙыл Армияһында» һүҙҙәрен «СССР Ҡоралл Көстәре сафтарында» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

23. 102-се статьяның беренсе өлөшөндә «ҡайһы расанан һәм милләттән» һүҙҙәренән һуң «енесенә» тигән һүҙҙе ҡушырға.

102-се статьяға ошондай йөкмәткеле икенсе өлөш ҡушып тулыландырырға:

Башҡорт АССР-ының 21 йәшкә еткән һәр бер гражданине ҡайһы расанан һәм милләттән булыуына, енесенә, диненә, белем цензына, ултыраҡлылығына, социаль сығышына, мөлкәт хәленә һәм үткәндәге эшмәкәрлегенә ҡарамаҫтан, Башҡорт АССР-ының Верховный Совете депутаты булып һайлана ала».

24. 105-се статьяла «Ҡыҙыл Армияға» һүҙҙәрен «СССР-ҙың Ҡоралл Көстәренә» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

25. 108-се статьяла «Өфө ҡалаһының ҡала Советы» һүҙҙәрен «Өфө һәм Черниковск ҡалаларының ҡала Советтәре» тигән һүҙҙәр менән алыштырырға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы Председателе Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.
Башҡорт АССР-ы Верховный Совете Президиумы Секретаре Ә. БИКТИМЕРОВ.

Өфө, 16 июнь, 1948 йыл.

Уның батырлығы алға саҡыра

Бынан биш йыл элек Александр Матросов Чернушки ауылы яҡында, ҡарағай урманында, тиңһеҙ батырлыҡ күрһәтеп, һәләк булды. Ләкин ул бөгөн дә, тере кеүек, йәшәй. Иптәш Сталин приказындағы һүҙҙәр һәр кемдең хәтерендә:

...Иптәш Матросовтың бөйөк батырлығы Ҡыҙыл Армияның бөтә воиндәре өсөн батырлыҡ өлгөһө булып хеҙмәт итергә тейеш.

...Советтар Союзы Геройы рядовой Александр Матвеевич Матросовты мәңгегә Александр Матросов исемендәге 254-се гвардия полкының 1-се ротаһы теҙмәһенә индерергә.

Шулай итеп, Саша мәңгегә тереләр теҙмәһенә индерелде һәм уның исеме миллиондар йөрәгендә мәңге һаҡланыр.

СССР Верховный Совете Указы менән 1946 йылдың 19-сы июнендә рядовой Александр Матросовҡа Советтар Союзы Геройы исеме бирелде. Биш йыл үтте. Уның исеме һуғыш ваҡытында кешеләрҙе батырлыҡҡа саҡырһа, хәҙер, тыныс шарттарҙа, бөтә Совет йәштәренең йөрәген елкендерә. Улар:

— Беҙ матросовсылар! Беҙ алда булырға тейешбеҙ! — тиҙәр.

Матросов, шулай итеп, коммунизм төҙөү фронтында ла батырлыҡ символына әйләнде. Республикабыҙҙың күп завод һәм фабрикаларында комсомол-йәштәр бригадаһы уның исемен йөрөтә. Өфө телефон заводындағы Фатима Аҡбулатова бригадаһы, Матросов исеме бирелгәс, тағы ла яҡшыраҡ эшләй башланы. Фатима Аҡбулатова һәм уның иптәштәре — Зәйнәп Мөхәмәтнәбиева, Валя Першина, Сибғәтуллиналар заводҡа һуғыш йылдарында ғына килделәр. Шуға ҡарамаҫтан, улар производство күрһәткестәре яғынан күп ҡарт эшселәрҙе уҙып киттеләр. Айҙан-айға уларҙың хеҙмәт темпы үҫә бара: Аҡбулатова бригадаһы планды ғинуарҙа — 197, февралдә — 208, мартта — 222, апрелдә — 178, майҙа — 196 процентҡа үтәне.

Рус армияһының тарихе күп кенә данлы исемдәрҙе белә һәм хөрмәт менән һаҡлай. Ул исемдәр араһында бер нисә рядовой һалдаттарҙың да данға күмелгән исемдәре бар. Севостополь обороналығында, 1854—55 йылда, рус һалдаты Бухвостовтың күрһәткән батырлығы, матрос Кошки, пехота һалдаты Архип Осиповтың батырлыҡтары тураһында әкәт быуындан-быуынға күсеп һөйләп килә. Саша уларҙың данын дауам итеүсе.

Саша Өфөнән! Үҙ ҡалабыҙҙың яҡын, туған кешеһе! Ул билдәһеҙ кескенә Чернушки ауылында үҙен генә түгел, беҙҙең Башҡортостанды ла, Өфөнө лә данланы. Беҙ уға күрһәткән өлгөһө өсөн, рәхмәт әйтәбеҙ. Беҙ сафта һәр ваҡыт уның һүҙен ҡабатлайбыҙ:

—Әгәр кәрәк булһа, Ватан өсөн, Сталин өсөн үҙ ғүмеремде бирермен, ҡулдарым ҡорал тота алғансы, йөрәгем һуңғы тапҡыр типкәнсе дошман менән һуғышырмын!

Ул беҙҙең сафтың һәр ваҡыт уң флангыһында тора.

Ә. Бикчәнтәй

Камал Хәбиб

Үлемһеҙлек

Өс сәғәт буйы ярылды
Дошман өҫтөнә туптар.
Ҡыйралыштың аҡтарылды
Цементтан ҡойған дзоттар.
Диңгеҙ тулҡыны өҫтөндә
Ҡәмә бәйелгән төҫлө,
Ер һелкенде. Күк тетәндә
Ҡапланды аҡлан өҫтө.
Быҡа ҡыҙыл ракеталар
Һуҙылып осто күккә.
Атакаға роталар
Киттеләр ялҡын утҡа...
Дошман биклән алды юлды
Кинәт уң флангтан.
Гвардеецтар ергә һыйынды
Дауылдай яуған уттан
Нөкта кеүек, ҡалҡыулыҡта
Күренде немец доты.
Баш күтәрә алмай минут та
Ятты гвардия полкы...
Мең биш йөҙ кеше ғүмерен
Ҡотҡарырға үлемдән,
Ғүмерен алмашып үҙенең
Үлемһеҙлек, дан менән,
Аранан бер һалдат торҙо —
Матросов ине ул:
— Мин барам, — тип
ҡысҡырҙы, —
Һеҙгә асыу өсөн юл!..
Һуңғы ҡанға тиклем илде
Яҡлармын, — тине Саша.
Дотҡа ул үрмәләп килде
Сикһеҙ барьерҙар аша.
Һәм бөтә ҡолаҫын киреп,
Аяҡҡа тороп баҫты,
Тәне менән, ҡая кеүек,
Амбразураны япты.
Дауыл баҫылған шикелле
Пулемет ҡалды тынып.
Атакаға күтәрелде
Ура ҡысҡырып полк.
Үлемһеҙлек яулап алды
Матросов ғүмерен биреп;
Мәңгелеккә данлы ҡалды
Иң бөйөк һәйкәл кеүек.

Урожай йыйнауға әҙерлекте бөтә яҡлап йәйелдерергә

А. ДЕНИСОВ
БАССР Ауыл хужалығы министры

Ағымдағы йылда, яҙғы байтаҡ [illegible] килеүенә ҡарамаҫтан, яҙғы сәсеүҙе [illegible] һәм, үткән йылдарға ҡарағанда, юғары агротехник кимәлдә [illegible] 1947 йылға ҡарағанда, [illegible] мең гектарға артығыраҡ сәселде, [illegible] 338 мең гектарға [illegible]

[illegible]

[illegible] Урып-йыйнауға һәм государствоға иген тапшырыуға [illegible] 200 мең гектар [illegible]

[illegible]

яҡшы итеп әҙерләргә кәрәк. Шуның менән бергә урожайҙы салғы һәм ураҡтар менән дә йыйырға тура киләсәк. Тимәк, был ҡоралдарҙы булдырыу өсөн дә хәстәрлек күрелергә тейеш.

Урожай йыйнауҙың ябай машиналарын ремонтлауҙы [illegible]

[illegible]

МТС-тарҙа һәм колхоздарҙа [illegible]

машиналарын ремонтлауҙы көсәйтеү менән бергә, комбайндарға урып-йыйнау өсөн участкаларҙы һайлап алырға һәм билдәләп ҡуйырға кәрәк. Был майҙандарҙы ҡый үләндәренән таҙартыуға айырыуса иғтибар бирелһен. Комбайн [illegible]

[illegible]

Урожай йыйнауҙы уңышлы [illegible]

Үткән йыл республикабыҙҙың [illegible]

уртаса ни бары бер генә рыдыуан бар ине. Быйыл да ул хаталарҙы ҡабатламаҫ өсөн, һәр бер колхоз һис кисекмәҫтән һәр бер атҡа кәмендә бер рыдыуан йәки бричка булдырыу сараһын күрергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта [illegible]

Колхоздарҙа [illegible]

Урожайҙы бригадалар һәм звенолар буйынса айырым иҫәпкә алыу өсөн хәҙерҙән үк ныҡлы әҙерләнеү талап ителә. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы колхоздарҙа доход бүлеүҙе бригадаларҙа һәм звенолорҙа [illegible]

Государствоға иген тапшырыуҙы [illegible]

Республикабыҙ игенселәре [illegible]

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Англия коммунистар партияһының белдереүе

ЛОНДОН, 14 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһы, кисә Англия коммунистар партияһы, алты көнбайыш державаһының көнбайыш Германия тураһындағы планын ғәйепләгән белдереүен иғлан итте, тип хәбәр итә. Компартияның белдереүендә, был план «һуғыштың еңгәшкән бөтә маҡсаттарынан баш тартыу» булып тора, тип әйтелә.

Шулай уҡ, коммунистар партияһының белдереүендә, «Германияның реакцияһын һәм уның монополистик промышленносен америкалылар контролендә ҡайтанан торғоҙоу, Германиянан көнсығышта һәм көнбайышта урынлашҡан бөтә Европа илдәренә ҡурҡыу һалыу һәм һуғышҡа әҙерләнеү булып тора. Был Англияның аяҡҡа баҫыуына һәм Англия халҡына турапан-тура ҡурҡыныс булып тора», тип әйтелә.

Коммунистар партияһы Англияның эшселәр хәрәкәтен һәм Англия халҡын был планды кире ҡағырға һәм Германияны демократиклаштереүҙе, Потсдам килешеүҙәре нигеҙендә, тыныслыҡ юлы менән хәл итеүгә көрәшеү өсөн, бөтә Европа халыҡтары менән берләшергә һәм дүрт державаның килешеүе нигеҙендә, Европала тыныслыҡтың берҙән-бер нигеҙе булған, берләшкән демократик Германия менән крашыу договорына ҡул ҡуйыу менән хәл итергә саҡыра.

Профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһының БМО экономик һәм социаль советына хаты

НЬЮ-ЙОРК, 16 июнь. (ТАСС). Берләшкән милләттәр ойошмаһы секретариаты былай тип белдерҙе: профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһы БМО-ның экономик һәм социаль советына, Советтең Женевала буласаҡ сессияһында ҡарау өсөн, резолюция проекты ебәрҙе. Был проект Аргентинаны, Бразилияны, Бирманы, Чилиҙе, Египетте, Грецияны, Индияны, Иранды, Португалияны, Испанияны һәм Көньяҡ-Африка союзын Берләшкән милләттәр ойошмаһының профсоюздарға ҡағылған принциптарын боҙоуҙа ғәйепләй. Профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһы был илдәрҙең БМО-нда член булып торғандарын шундай боҙоуҙарҙы туҡтатырға саҡыра.

Резолюцияға беркетелгән хатта былай тип әйтелә: Аргентина хөкүмәте забастовкаларҙы тыйҙы һәм хеҙмәт шарттарын яҡшыртыуға йүнәлдерелгән һәр төрлө сараларҙы үткәреүгә ҡаршылыҡ күрһәтә. Бразилияла хөкүмәт профсоюздарҙы контролләй, Бирма властары забастовкаларға ҡаршы сыға, һәм шуның һәҙемтәһендә профсоюз эшмәкәрлеген зәғифләндерә. Чилиҙә забастовкалар хәрби һәм террористик методтар менән баҫтырылалар. Египетта бөтә профсоюздар эшмәкәрлеге полиция контролендә. Грецияла забастовкалар тыйылған, ә профсоюз члендарын климаты сәләмәтлеккә зарарлы булған утрауҙарҙағы концентрацион лагерҙарға ябалар. Индияла үҙәк һәм провинциялағы властар профсоюздарға ҡаршы күптән түгел ҡыҙыу кампания башланылар һәм профсоюздарҙың бер мең члене ҡулға алынды. Шул иҫәптән, профсоюздарҙың бөтә Индия конгресы председателе Данге ҡулға алынған. Иранда профсоюздарҙың күп члендарын Төньяҡ Ирандан көньяҡҡа һәм Персия заливындағы утрауҙарға урынлашҡан концентрацион лагерҙарға оҙаталар. Португалия хөкүмәте һайланып ҡуйылған кешеләрҙе, хөкүмәт политикаһына ҡаршы сыҡҡандары өсөн эштән мәхрүм итте. Испанияла баш күтәреүселәрҙе хөкүмәт арестҡа ала һәм ата. Көньяҡ-Африка союзы хөкүмәте забастовкаларҙы тыя һәм эшселәргә массовый ойошмалар төҙөргә рөхсәт итмәй.

Профсоюздарҙың бөтә донъя федерацияһы политик һәм социаль советҡа, бөтә илдәрҙә профсоюздарҙың хоҡуҡтарын яҡлау маҡсатында, даими ныҡлы күҙәтеү алып барыуҙы тәьмин итергә ҡуша.

Франция Милли собраниеһендә

ПАРИЖ, 16 июнь. (ТАСС). Кисә Милли собраниела тышҡы политика тураһында фекер алышыуҙар барғанда залдың яртыһы буш булды. Шунға тиклем сығыш яһаған ораторҙар бөтәһе лә Лондон тәҡдимдәренә теге йәки был дәрәжәлә ризаһыҙлыҡ белдерҙеләр һәм төрлө иҫкәрмәләр яһанылар.

Луи Марэн («бойондороҡһоҙ республикасылар» группаһы члене) былай тине: «Лондон килешеүҙәре Францияның именлегенә шул тиклем ҡапма-ҡаршы киләләр, уларҙы хуплау енәйәт булыр ине». Марэн үҙенең телмәрендә «Гитлерсе көсөттө» тар-мар итеүҙә Совет Армияһының ролен таныны.

Газеталар үҙҙәренең комментарийҙарында Франция хөкүмәтенә Лондон тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыуҙы тиҙләтеү маҡсатында һәм парламенттең ҡайһы бер кругтарына американлылар һәм инглиздәр тарафынан ҡыҫым булғанлығын билдәләйҙәр.

«Се Суар» газетаһы былай тип яҙа: «Лондон тәҡдимдәре Милли собраниела тикшерелә башлаған моменттән бирле Францияның ялған союзниктәре һәм ялған дуҫтары — Америка һәм Англия хөкүмәттәре Франция менән шул тиклем оятһыҙ рәүештә мөнәсәбәт иткән кеүек мөнәсәбәт бөтә тарихта күренгәне юҡ ине».

Милли собраниенең бюроһына коммунист депутаттар тарафынан резолюция проекты индерелде. Был резолюция проекты алты державаның Германия мәсьәләһе буйынса булған килешеүен ғәйепләй.

Коммунистар группаһы тарафынан тәҡдим ителгән резолюция проектында былай тип әйтелә: «Лондон конференцияһының тәҡдимдәре ҡабул ителерлек түгел, сөнки улар Көнбайыш Германияның реакцион һәм агрессив көстәренең яңынан тыуҙыуына булышлыҡ итәләр һәм Францияның уның ысын гарантияларынан һәм репарацияларға булған законлы хоҡуҡтарынан мәхрүм итәләр».

Резолюция «донъяның бөтә көстәренең берлектә эшләүҙәренә, Берләшкән милләттәр ойошмаһының уставын хөрмәт итеүгә һәм бөтә демократик илдәрҙең Берләшкән милләттәр ойошмаһы рамкаларында хеҙмәттәшлек итеүенә нигеҙләнгән ғәҙел һәм ныҡлы тыныслыҡ урынлаштырыуға йүнәлдерелгән политика үткәреүҙе» талап итәләр.

Де Голь яҡлы булған һәр төрлө партияларҙың депутаттары ингән «ысын демократия өсөн көрәш» группаһы тип аталған группа үҙенең проектын индерҙе. Был проект та Лондон «тәҡдимдәрен» тәйенләй».



Өфө тимер юл работниктәренең балалары өсөн Ключарево районында пионерҙар лагере асылды. Быйыл унда 750 пионер һәм ...сы балалар ял итергә тейештәр.

Һүрәттә: Лагерҙән бер күренеш.

(А. Калашников һәм Ириков фото...)

Балалар тураһында хәстәрлек

Республикала Ватан һуғышында һәләк булыусыларҙың йәтим ҡалған балаларына хәстәрлек эше йылдан-йыл, көндән-көн арта бара.

Ағымдағы йылда республиканың балалар йорттарында тәрбиә эшен көсәйтеү, тормош шарттарын яҡшыртыу, тәрбиәләнеүселәрҙең сәләмәтлектәрен нығытыу тәңгәлендә байтаҡ мөһим саралар үткәрелде. Быйыл ғына бай йыһазландырылған уң яңы балалар йорто асылды.

Былар ҙан башҡа Өфө, Дәүләкән, Мәләүез, Ғафури, Ҡалтасы һәм башҡа урындарҙа — бөтәһе 8 балалар йорто тибындағы һауыҡтырыу йорттары һәм ике санаторий тибындағы балалар йорто асылды. [illegible]

Бөтә ҡалаларҙағы балалар ... тарының тәрбиәләнеүселәре ... лыҡ лагерҙарға сығарылалар ... Белорет, Бөрө, Дүртөйлә бала... йорттары йәйге сезонға ... ға сыҡтылар. 26 балалар йорто тәрбиәләнеүселәре илдең ... лығы, байлығы менән таны... өсөн, Башҡортостандың иң ... тәбиғәтле урындарына, та... әһәмиәткә эйә булған ... географик яҡтан әһәмиәтле ... райондарға туристик походтар ... таләр.

Ағымдағы йылда балалар ... тарында тәрбиәләнеүселәрҙең ... номикаһын күтәреү яғына ... тәрлек күреү менән генә ... йынса, тәрбиә эштәрен яҡшы... тәңгәлендә лә байтаҡ эш ... [illegible]

Рахман Ка...

Әҙәби альманах

«Литературная Башкирия». Альманах. Башҡортостан совет яҙыусылары Союзының рус секцияһы һәм Башгосиздат баҫмаһы, 91 бит, хаҡы 3 һум 50 тин. Тиражы 3500. Рус телендә.

[illegible]

АҠШ сауҙа министренең белдереүе

ВАШИНГТОН, 15 июнь. (ТАСС). АҠШ-тың сауҙа министре Сойер, Синсиннатта (Огайо штаты) сығыш яһаған сағында эске һәм тышҡы көслө факторҙар һәҙемтәһендә Ҡушма Штаттар алдында инфляция булыуҙын сериоз ҡурҡыныс тора, тип иҫкәртте. Ҡорос һәм тимер-томорҙоҡ етешмәүен һәм тимер рудаһы, башҡа металл рудалары һәм руда булмаған минераллар запасының бөтөп барыуын күрһәтеп, Сойер былай тине: «Беҙ үҙебеҙҙең илебеҙҙе тәбиғи ресурстарҙың «бөтмәслек» запасы булған ил тип иҫәпләй алмайбыҙ... Беҙ үҙебеҙҙең тәбиғи байлыҡтарыбыҙҙың бөтөп барыу фактыһын һаҡға һукмай булдыра алмайбыҙ», тине.

Ул: Ҡушма Штаттарҙың экономикаһы «ныҡылмалы» булып тора, ләкин инфляция тенденцияһынан беҙ «нәмә эшләргә теләгәнлегебеҙҙе айыҡ рәүештә билдәләгән хәлдә генә һәм производство механизмебеҙҙе яҡшы хәлдә һаҡлар өсөн бөтә һаҡлыҡ сараларын күргән хәлдә генә ҡотола алабыҙ» тине.

Сойер: «Маршалл планы», көслө рәүештә киңәйтелгән ҡоралланыу программаһы кеүек уҡ, көсөркәнеш тыуҙыра, Американың экономикаһы быны нисек тә башҡарып сығырға тейешле, тип белдерҙе. Ул, әгәр Ҡушма Штаттар экономик проблемаларҙы хәл итә алмаһалар һәм инфляция ҡурҡынысын еңеп сыға алмаһалар был капиталистик системаһан ризаһыҙлыҡ тыуҙырыр һәм «коммунизмдең таралыуына сәбәп булыр» тигән фекер белдерҙе.

Япон диңгеҙендә Корея балыҡсылары кәмәләрен бомбаға тотоу

ПХЕНЬЯН, 16 июнь. (ТАСС). Көньяҡ Кореяның полиция властаре 8 июндә, Америка самолеттарында була торған таныу билдәле дүрт моторлы 9 самолет, 38-се параллелдән 48 километр алыҫлыҡта көньяҡҡа табан, Докто утрауҙары районында, Япон диңгеҙендә Кореяның балыҡсылары кәмәләрен бомбаға тоттолар. Америка самолеттары, диңгеҙ үҫемлектәрен йыйнаған кәмәләрҙе, 20 минут ваҡыт атакаланылар. Бомбаға тотоу һөҙөмтәһендә Корея балыҡсыларынан 14 кеше үлтерелгән һәм 10 кеше яраланған. 11 кәмә һыуға батырылған. Полицияның белдереүендә Америка самолеттары тарафынан бомбаға тотолған балыҡсылар Көньяҡ Кореяның Ныонсанг Пуктола йәшәүсе кешеләр, тип әйтелә.

Кореяның информацион хеҙмәте Америка самолеттары Кореяның балыҡсылары кәмәләрен атакаланылар, тип дөрөҫләне. Был хәбәр ваҡиға булған урындан бирелгән. Ҡайһы бер мәғлүмәттәргә ҡарағанда, 20 кеше үлтерелгән.

Американың Кореялағы хәрби властаре, Кореялағы базаларҙа булған Америка самолеттарының Корея балыҡсылары кәмәләренә бомба ташлауҙары тураһында уларға бер нәмә лә билдәле түгел, тигән булып хәбәр итәләр.

ТОКИО, 16 июнь. (ТАСС). «Старс энд Страйпс» газетаһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Американың Алыҫ Көнсығышта авиацион көстәренең Токиолағы штабы, үҙенең ҡарамағында булған самолеттар, 8 июнда дүрт моторлы 9 Америка самолеты Кореяның судноларын бомбаға тотто, пулеметтан атты һәм 11 судноны һыуға батырҙы, һөҙөмтәлә 14 балыҡсы үлтерелде, тип Корея полицияһы күрһәткән урында самолеттар учение алып барҙы һәм бик бейектән бомбалар ташланы, тип дөрөҫләне. Учение үткәргән ваҡытта алынған фотографиялар Токиоға «Корея балыҡсыларын ҡыҙғанмай маҡсат менән үлтереүҙәрен билдәләү өсөн өйрәнергә Америка һауа көстәренең юғары дәрәжәләге вәкилдәренә ебәрелгән».

Бенеш менән Готвальд араһында телеграммалар алышыу

ПРАГА, 16 июнь. (ТАСС). Чехословакияның элекке президенте доктор Эдуард Бенеш һәм Чехословакия республикаһының президенте Клемент Готвальд менән телеграммалар алыштылар.

Үҙенең телеграммаһында Бенеш былай тип яҙа: «Президент әфәнде. Һеҙ беҙҙең ҡәҙерле республикабыҙҙың беренсе работниге булыу бәхетенә ирештегеҙ. Һеҙҙе ысын күңелдән ҡотлайым һәм тәбрик итәм. Һеҙҙең Эдуард Бенеш».

Готвальд түбәндәге телеграмма менән яуап бирҙе: «Президент әфәнде. Минә республиканың президенте итеп һайлау айҡанлы һеҙҙең ҡотлауығыҙ һәм тәбрикләүегеҙ минең өсөн ҙур шатлыҡ булды. Һеҙгә ысын күңелдән рәхмәт әйтәм һәм һеҙгә иң яҡшы теләктәр теләйем. Һеҙҙең Клемент Готвальд».

КӨНБАЙЫШ ГЕРМАНИЯЛА АҠСА РЕФОРМАҺЫ

ЛОНДОН, 17 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Майндағы Франкфурттан хәбәр итеүенсә, ышаныслы «сығанаҡтарҙан алынған хәбәрҙәргә ҡарағанда, 18 июнда көндөҙгө 3 сәғәттә (гринвич ваҡыты менән) немец газеталарында баҫыу өсөн Көнбайыш Германияла аҡса реформаһы тураһында официаль белдереү биреләсәк. Был белдереүҙең тулы текстын баҫып сығарыу өсөн бөтә газеталарға ла өҫтәмә ҡағыҙ расходларға рөхсәт ителә.

Колхозда лекция-концерт

Башҡортостан государство филармонияһының концерт бригадаһы ошо көндәрҙә Учалы районы колхоздарында бөйөк рус яҙыусыһы Максим Горький һәм башҡорт әҙәбиәте классигы Мәжит Гафури иҫтәлегенә арналған лекция-концерттар менән сығыштар яһаны. Бригаданың программаһына был ике яҙыусының ижади юлы тураһында лекциялар һәм уларҙың әҫәрҙәренән өҙөктәр, халыҡ йырҙары һәм халыҡ бейеүҙәре ингән.

Был концерт бригадаһы Учалы районының бер нисә колхозында булғандан һуң Белорет районына барасаҡ.

Элеватор һәм склад... ремонтлана

Республикала яңы урожай... игенен ҡабул итеүгә әҙерлек... тәре башланды.

Элеваторҙарҙы, склад... монтлау өсөн 950 мең һум... билдәләнгән. Хәҙер күпселек... ватор һәм иген ҡабул итеү... тарында ремонт эштәре бө... релде. Шеңгәкүл элеваторы... монт эштәрен республикала б... се булып тамамланы.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

Фельетон урынына

Көтөлмәгән хәл...

Күптән түгел Ғафури районының Ҡауарҙы ауылында көтөлмәгән хәл булды: Ауырғазы колхоз-совхоз театры килде. Бәлки, был башҡа ауылдар өсөн көтөлмәгән хәл дә түгелдер... Ләкин беҙҙең өсөн ул шулай. Ни өсөн тиһәң, театрҙың директоры иптәш Әхмеров беҙҙең ауылды... культураһыҙ һанап, гел ситләп үтеп китә торғайны. Беҙҙеңсә, театр — ауылға культура килтереүсе, яҡтыртыусы ойошма. Шулай булғас, директор «ҡараңғы» мөйөштәргә күберәк иғтибар бирергә тейеш ине. Был мәсьәләне театр етәкселәренең намыҫына ҡалдырабыҙ, һүҙ але ул турала бармай.

Ҡауарҙы ауылында хәҙер «Ильич лампочкалары» балҡый, ете йыллыҡ мәктәп бар. Бында матур һәм яҡшы йыһазландырылған уҡыу өйө эшләй. Колхозсылар газета, журнал уҡыйҙар, ял ваҡыттарында шашка, шахмат уйнайҙар, волейбол уйнайҙар. Баҫыуҙарҙы СТЗ тракторы яңғырата. «Алға» тигән стена газетаһы сығарыла, массаларҙы юғары урожай өсөн көрәшкә ойоштора, әтәкләй. Драма түңәрәге бар. Күптән түгел беҙҙең йәштәр үҙҙәре Б. Бикбайҙың «Айбәк» тигән либреттоһын ҡуйҙылар. Колхозсылар аңлы, алдынғы социализм төҙәүселәр бында.

Белмәйем, иптәш Әхмеров Ҡауарҙыла ниндәй «культураһыҙлыҡ» тапҡандыр... Ул быны асыҡ ҡына аңлатып бирә алмаңы. Тик, ҡасандыр бер бында булған саҡта, ниндәйҙер артисткаһың ...яулығы юғалған икән. Насар булған. Бәлки, бик яҡшы яулыҡтыр... Ләкин уның өсөн бөтә ауылды «ҡәһәрләү» кәрәк ине микән?!

Театр башланды. Башта татар классик драматургы Ғ. Камалдың «Беренсе театры» ҡараныҡ. Бында театрҙың элекке уйындары менән танылған, ҡараусыларҙы һоҡландырған Мифтахов, Насирова, Әхмерова кеүек, күренекле актерҙарҙы, күптән түгел генә сәхнә күргән, Гүзаиров һәм Мифтахова кеүек, өмөтлө артистәре сыҡтылар.

Бына ошонда инде беҙҙең өсөн... көтөлмәгән хәлдәр башланды: иптәш Мифтахов үҙ роленә яуапһыҙ ҡараған, яһалма уйнай, ҡараусыларҙы ышандырмай; Ә аҫырау ҡыҙ ролендәге иптәш Мансурова—артыҡ балаларса ҡылана, профессионаллыҡ юҡ һәм башҡалар. Бәлки, «бәләкәй» пьеса, нисек уйнаһаң да «үтер» әле, тип уйлағандарҙыр... Юҡ, үтмәне, коллектив үҙе генә ижад яғынан бәләкәй итеп күрһәтте.

Икенсе көтөлмәгән хәл — «Ямал» пьесаһы булды. Был пьеса — совет кешеләрен яла яғыуҙан башҡа нәмә түгел. Ниндәйҙер Ямал, пьесала — уны звено етәксеһе тип йөрөтәләр, бар икән. Ул насар характерле ҡыҙ, имеш. Уның юғары урожай алыу, Ватандың ҡеүәтен тағы ла арттырыу маҡсаттары юҡ, бар ҡайғыһы... кейәүгә барыу икән. Шул ҡыҙҙы шағир Кимал ярата. Беҙҙеңсә, уны шағир — «кеше рухының инженеры» генә түгел, ябай колхозсы ла яратмаҫ ине.

Ул ғына түгел, пьесала сей, етлекмәгән бригадир образы бар. Етмәһә, театрҙың художество етәксеһе уны — көлкәлә яһайым, тип үтә «төҙәлеп» тә ебәргән. Ул Ямалдан ҡурҡа, ҡаса, ҡулдары ҡалтырай, алдында ҡойолоп төшә. Ундай бригадирҙар юҡ колхоздарҙа, бәлки, социалистик ауыл хужалығын алға етәкләүсе командирҙар бар.

Беҙҙең колхозсылар был пьесаның авторы кем булыуы менән ҡыҙыҡһындылар. Ләкин был турала коллективтың бер кешеһе лә яуап бирә алманы. Пьесаның зарарлы, дөрөҫлөктө боҙоп күрһәтә икәнлеге әйтелгәс, иптәш Әхмеров:

— Беләбеҙ инде, беләбеҙ. Был турала худрук менән үҙем дә һүҙгә килеп бөттөм, тип яуап бирҙе.

Бер һорау тыуа: ысынбарлыҡты боҙған әҫәрҙе ҡуйған өсөн ул да яуаплы бит. Шулай булғас, ниңә һуң иптәш Әхмеров уға юл ҡуя? Быныһы икле беҙҙең өсөн тағы ла көтөлмәгән хәл. Хәйер, беҙ һеҙгә ҡыҙыҡтарын күрһәтәбеҙ. Даяндың «Алтын шишмәһе» һеҙгә нәмәгә кәрәк? Баҫыуға тереҫ ташыуҙы үҙегеҙ ҙә күргәнегеҙ барҙыр»... тип ҡараған кешенән барыһын да көтөргә була.

Ауыл хәҙер — элекке ауыл түгел инде: үҫте, кешеләр ҙә үҫтеләр. Шул саҡ Ауырғазы колхоз-совхоз театрының һаман бер урында ҡатып ҡалыуы, хеҙмәтсәнләрҙе коммунизм рухында тәрбиәләү эшенә шулай яуапһыҙ, еңел ҡарауы — ысынлап та көтөлмәгән хәл!

БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре управлениеһы был театр менән ҡыҙыҡһыныр тип көтәбеҙ.

Ш. Юнысов.
Ҡауарҙы ауылы.

Ҡала малярия станцияһы 18 июндән 25 июнгә тиклем, республикан малярия станцияһының малярия серакәйҙәренең ҡуҡәйҙәренә ҡаршы көрәш маҡсатында һаҙлыҡтарға самолеттан ағыу һиптереүҙең наубәттәге икенсе турын үткәреүе тураһында белдерә.

Был эш Өфө ҡалаһынан 5 километр алыҫлыҡтағы зонала, Октябрь Революцияһы исемендәге завод, Миловка, Михайловка, Алексеевка, Романовка ауылдары, элекке 9-сы номерле совхоздың ҡала яны хужалығы, Александровка, Баавлевка, Өфө ял йорто, Дудкин кисеүе, Желиво, Чесноковка, элекке 5-се номерле совхоздың ҡала яны хужалығы, Нижегородка, Максимовка, Суровка, Тарбеевка, Степановка, Тимашево, Сосновка, Князево, Шакша, Р. Ер..., Касимово, Вешняково, ...ново, Елкибаево, Карп..., Зубово ауылдары, Дем ст...цияһы һәм Черниковск ...һы тирәһендә, тюльфенция... мин һәм париж йәшелә... һибеү юлы менән үткәреле...

Бал ҡорттары булған ... кешеләр, бал ҡорттарын ағ... лауҙан һаҡлау өсөн сар... күрергә тейештәр.

Умарталарҙы ағыуланған... һыуҙарҙан 7—10 кило... алыҫлыҡҡа күсерергә кәрә...

Мал-тыуарҙары булған ... шеләр малдарын ағыулан... һыуҙарға өс тәүлек буйы... ебәрмәҫкә тейештәр.

Белешмәләр өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Цюрупа ура..., 74-се номерле йорт, Телефон номере 2—92—91.

Ҡала малярия станцияһы.

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙаре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—... промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00181.

Өлкә газета-журналдар типографияһы.

Тиражы 15...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

28-се йыл сыға
1948 йыл
№ 122
20 июнь
йәкшәмбе
хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең II Пленумы тураһында информацион белдереү. (1-се бит).
Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн большевиктарса көрәшәйек! Ремонтсы һәм тимерсе иптәштәр! Урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы тиҙерәк тамамлайыҡ! (1-се бит).
Башҡорт АССР-ы Верховный Советының икенсе сессияһы. (2-се бит).
Советтар Союзында. (2-се бит).
СССР Сит ил Эштәре Министрлығында. (2-се бит).
И. Нестьев.—Н. А. Римский-Корсаков. (2-се бит).
ОКТЯБРҘЕҢ 31 ЙЫЛЛЫҒЫН ПРОИЗВОДСТВО ЕҢЕҮҘӘРЕ МЕНӘН ҠАРШЫЛАЙЫҠ! (3-сө бит).
Ишембай—Ермолаевка тимер юл тәҙәләшендә. (3-сө бит).
ЯҢЫ ДЕМОКРАТИЯ ИЛДӘРЕ. А. Шатилов. — Болгария халыҡ республикаһының демократик үсешендәге уңыштар. (3-сө бит).
Халыҡара күҙәтеү. (4-се бит).

ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең II Пленумы тураһында

Информацион белдереү

Ошо йылдың 17—18 июнендә ВКП(б) Башҡортостан Өлкә Комитетенең сираттағы Пленумы булып үтте.

Пленум түбәндәге мәсьәләләрҙе тикшерҙе:

1. Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнау, ауыл хужалығы продукттары әҙерләү буйынса партия ойошмаларының бурыстары (доклады Өлкә Комитете секретаре иптәш Каменев).

2. Өлкә партия ойошмаларында пропаганда һәм агитация эштәренең торошо һәм уларҙы көсәйтеү саралары тураһында (доклады Өлкә Комитеттең пропаганда буйынса секретаре иптәш Шафиков).

Тикшерелгән ике мәсьәлә буйынса ла Пленум тейешле ҡарар ҡабул итте.

Рационализаторлыҡ һәм уйлап сығарыу эштәренә киң юл!

Предприятиеләрҙә эшләп сығарыу темпын тиҙләтә һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген артабан күтәрә барыуҙа, илебеҙгә продукциялар етештереүҙе арттырыуҙа ижади эш, ижади фекер ҙур роль уйнай. Шуға күрә лә большевиктар партияһы һәм Совет хөкүмәте техник үсеш өсөн, юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге өсөн көрәшеүселәрҙең — уйлап сығарыусы һәм рационализаторҙарҙың эшен һәр ваҡыт юғары баһалай. Ошо көндәрҙә хөкүмәтебеҙ тарафынан күп кенә фән һәм техника деятелдәре менән бер рәттән, юғары етештереүсәнле эш методтары инициаторҙары—Уралдағы Киров исемендәге завод технологы А. Ивановҡа, Мәскәүҙәге «Ҡалибр» заводының өлкән мастеры Н. Российскийға һәм башҡаларға Сталин премияһы лауреаттары исеме бирелеүе бының йәнле шаһите булып тора.

Стахановсы яңы эш методтарын ҡулланыу һөҙөмтәһендә, нефть промышленносе эшендә күренекле өлгәшеүҙәргә ирешкәндәре өсөн күптән түгел республикабыҙҙың «Ишембайнефть» тресының өлкән мастеры Аҡмал Вахитов, «Туймазынефть» тресының беренсе класс бораулау мастеры Иван Куприянов иптәштәргә юғары исем—Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Балабанов, Киутов һәм башҡа тиҫтәләгән алдынғы нефтселәр СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградландылар. Улар —Башҡортостан хеҙмәтсәндәренең ғорурлығы.

Башҡортостан нефть промышленносенда генә йөҙҙәрсә рационализаторҙар һәм уйлап сығарыусылар иҫәпләнә. Улар тарафынан индерелгән һәм шуларҙан тормошҡа ашырылған 300-ҙән артығыраҡ тәҡдимдән бер йыл эсендә бер нисә миллион һум самаһы экономия алына.

Бының кеүек миҫалдарҙы башҡа заводтарҙан һәм предприятиеләрҙән дә килтерергә мөмкин. Ижади фекергә рационализаторлыҡ һәм уйлап сығарыу эшенә иғтибар биргән, данлыҡлы новаторҙар А. Иванов, Н. Российский, В. Матросов, Якушиндәрҙең методтарын производствоға киң индергән предприятиеләребеҙ (Өфө) нефть эшкәртеү, штамплылау, телефон аппараттары, яҙыу машиналары заводтары һәм башҡалар) рентабелле эшләү, сырье, материалдарҙы, электр энергияһын экономиялау һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеү буйынса байтаҡ уңышлыҡтарға ирештеләр. Мәҫәлән, Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективе ойоштороу-техник саралар планын һәм рационализаторлыҡ тәҡдимдәрен тормошҡа ашырыу арҡаһында, ошо йылдың дүрт айы эсендә генә бер миллион һумдан артыҡ экономия яһаны, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын 5,4 процентҡа түбәнәйтте.

Телефон аппараттары заводында баш конструктор иптәш Брант уйлап сығарған яңы телефон станциялары конструкцияһын, инженер иптәш Алябик конструкцияһындағы индукторҙы ҡулланыу заводҡа хеҙмәт етештереүсәнлеген байтаҡ күтәреүгә һәм продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтеүгә ярҙам итте. Ошондай ижадсылыҡ һәм ойоштороу-техник сараларҙы тормошҡа ашырыуҙан коллектив йөҙҙәрсә мең һум экономия яһауға өлгәште.

Бындай предприятие коллективтәренең производство пландарын уңышлы үтәй барыуҙарын производство процестарен механизациялаштырыуҙа һәм эске резервтарҙе тулы хәрәкәткә килтереү юлдарын эҙләп табыуҙа, башлыса, рационализатор һәм уйлап сығарыусылар араһында даими эш алып барыуҙары менән аңлатырға кәрәк.

Шулай ҙа Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводы, Баймаҡ баҡыр иретеү комбинаты, урман һәм урындағы промышленность Министерстволары предприятиеләре кеүек ҡайһы бер предприятиеләребеҙҙә был мөһим эшкә тейешенсә баһа биреп еткермәйҙәр әле. Предприятие етәкселәре, ундағы партия һәм бигерәк тә профсоюз ойошмалары производство процестарен камилләштереү һәм механизациялаштырыуҙа, техниканың яңы төрҙәрен ҡулланыуҙа, эске бай мөмкинлектәрҙе тулы файҙаланыуҙа етерлек рәүештә ныҡышмалы эш алып бармайҙар. Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводында рационализация тәҡдимдәренең производствоға йомшаҡ индерелеүен етәкселәрҙең, инженер-техник работниктәрҙең был мөһим мәсьәлә менән көндәлек рәүештә шөғөлләнмәүҙәре менән генә аңлатырға мөмкин.

Рационализаторлыҡ һәм ижадсылыҡ биш йыллыҡты срогынан алда үтәүгә йүнәлтелгән, һәм ул ойоштороу-техник сараларҙың айырылмаҫ өлөшө булып тора. Предприятиеләрҙең етәкселәре, инженер-техник работниктәре был мөһим хәрәкәттең башында тороп етәкселек итергә бурыслылар. Заводтарҙа, фабрикаларҙа ойошторолған техник кабинеттарҙе бай һәм йөкмәткеле итеп йыһазландырырға, уйлап сығарыусылар, рационализаторҙар менән систематик рәүештә кәңәшмәләр, конференциялар үткәрергә кәрәк. Шулай уҡ индерелгән тәҡдимдәр бик тиҙ арала ҡаралырға, яраҡлы табылғандары тотҡарлыҡһыҙ рәүештә производствоға индерелергә тейеш.

Рационализация һәм уйлап сығарыу эштәре беҙҙең бөйөк социалистик төҙөлешебеҙҙә яңы еңеүҙәр килтерә, халыҡ хужалығын яңы юғары баҫҡысҡа күтәрә. Бөтә предприятиеләрҙә массаларҙың ижади хеҙмәтенә киң юл! Рационализация һәм уйлап сығарыу эштәрен сталинсә яңы биш йыллыҡ талаптарына яуап бирерлек итеп ойошторайыҡ!

Донда шәкәр тростниге

ДОНДАҒЫ РОСТОВ. (ТАСС). Үҙған йыл Мокрая Кагаловка ауылы янында, Новочеркасск ҡалаһының сауҙа бүлеге тәжрибәселәре, 1,4 гектар майҙанда шәкәр тростниге сәскәйнеләр. Был, Донда беренсе тәжрибә рәүешендә сәсеү үткәреү ине.

Тәжрибә уңышлы булды. Бәләкәй генә участканан 125 бот орлоҡ үҫтереп алынды. Тростниктән джем, [illegible], ҡыҙыл араҡы әҙерләнде. Быйыл яҙ шәкәр тростниген сәсеү майҙаны 3 гектарға еткерелде.

Иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн большевиктарса көрәшәйек!

Ремонтсы һәм тимерсе иптәштәр! Урожай йыйнау машиналарын ремонтлауҙы тиҙерәк тамамлайыҡ!

Әҙерлек яҡшы

Краснокам районы колхоздары урожай йыйнауға яҡшы әҙерләнәләр.

Яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәргән Сталин исемендәге колхозда 2 урғыс, бер молотилка һәм 2 елгәргес машинаны яҡшы сифатлы итеп ремонтланды. Инженер Гоголен системаһындағы сушилка ла әҙер. Колхозсылар хәҙер ямалы ырҙындар әҙерләйҙәр, транспорт средстволары әҙерләйҙәр.

«Ҡыҙыл Сәгәнәк», «Октябрь», «Луч», «Бейек тау» колхоздарында ла яңы урожайҙы йыйнауға әҙерлек эштәре уңышлы алып барыла.

Н. Алиева.

Тимерлектәр бикле торалар

Тимерлек янында ремонтҡа килтерелгән ауыл хужалығы ҡоралдары күп кенә. Шулар араһында бесән һәүбәтте ремонтланырға тейешле булған 4 лобогрейка ята. Ләкин уларҙың береһенә лә тимерсе ҡулы тейгәне юҡ. Колхоз председателе иптәш Никандров:

— Уларҙы уракка төшкәс тә ремонтлап була, ә быйыл 15 көн инде тимерлектең күреген ремонтлап алмайбыҙ. Күрек әҙер булғас, урожай йыйнау ҡоралдарына ла күҙ һалырға уйлап торабыҙ, — ти.

Баҡалы районының «Новый завод» колхозында урожай йыйнауға бына шулай әҙерләнәләр.

Максим Горький исемендәге колхозда ла шул уҡ хәл. Бында тимерлек бөтөнләй бикле тора. 4 самосбросҡа һәм 3 лобогрейка ремонтланырға тейеш булһа ла, тимерселәр башҡа эштәрҙә файҙаланыла. Ә «Ҡыҙыл йондоҙ» колхозындағы тимерселәр — Әлмәхәмәт Закиров һәм Зәки Иамилов иптәштәр үҙ хужалыҡтарында айырым кешеләрҙең заказдарын эшләү менән шөғөлләнәләр. Бында тимерлек янында 3 лобогрейка ремонтланмай ята. Шулай уҡ 140 уракты тешләйе бар. «Смычка» колхозындағы тимерлектә лә тынлыҡ. Бында күмер һәм запас частар булмауға һылтанып, ремонтты башламағандар. Уларға күмер яндырыу өсөн тик урманға, запас частарҙы алып ҡайтыу өсөн район үҙәгенә генә барырға кәрәк ине. Ләкин ул эшләнмәй.

«Победа», «Ярыш», «Красная баррикада», «Ленинский путь» колхоздарында ла ремонт эштәре алып барылмай.

Баҡалы районы колхоздары урожай йыйнауға насар әҙерләнәләр. Колхоз председателдәре лә, шулай уҡ район ауыл хужалығы бүлеге етәкселәре лә урожай йыйнауға әҙерлек эшенә етәкселек итмәйҙәр. Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Байғуш һәм бүлектең баш агрономы Юдин иптәштәр хатта үҙҙәре йыл буйы колхоздарҙа ла урожай йыйнау ҡоралдарының шесек ремонтланыуы тураһында ҡыҙыҡһынмайҙар. Тимерлектәрҙең ябыҡ тороуҙары уларҙы борсомай.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Комбайндар ремонтланмай

Әбдрәшит МТС-ы етәкселәре комбайндарҙы ваҡытында ремонтлау эшенә иғтибар итмәйҙәр. Яҙғы сәсеү башланғас, ремонт бөтөнләй туҡталып ҡалғайны. Сәсеү тамамланғас та МТМ-да ремонт тейешенсә ойошторолманы. Комбайнерҙарҙың күпселеге эшкә ылыҡтырылмаған. Ремонтта күберәк йәш комбайнерҙар ҡатнаша. Улар даими контролгә һәм ярҙамға мохтаж булыуға ҡарамаҫтан, механиктәр тарафынан ярҙам күрһәтелмәй. Өлкән механик Сенкай һәм комбайндар буйынса механик Мирустай иптәштәр ремонтсылар араһында бик һирәк булалар.

Ремонтсылар өсөн эш һәм тормош шарттары тыуҙырылмаған. Инструменттәр етешмәй, сваркалау цехы эшләмәй. Дөйөм торлаҡ һәм столовой булдырылмаған. Ремонтсыларҙың күптәре МТМ-нан алыҫ ауылдарҙа торалар һәм ҡәҙерле эш ваҡыттарын юлда үткәрергә мәжбүр булалар. Шулай уҡ политик-массовый эш алып барылмай, социалистик ярыш ойошторолмаған.

Ремонтсылар аҙаһында эштең шулай насар ҡуйылыуы һөҙөмтәһендә комбайндарҙы ремонтлау планы айҙан-айға өҙелә. МТС-та 30 комбайн ремонтланырға тейеш булһа, ошо көнгә тиклем нит бары дүрт кенә комбайн стройға индерелде. Уларҙың да сифаты бик түбән. Комиссия был комбайндарҙың өсөһөндә 94 дефект тапты.

МТС етәкселәре запас частарҙе булдырыу тураһында алдан хәстәрлек күрмәнеләр һәм хәҙер ҙә бер нәмә лә эшләнмәй. 3 мотор, 3 радиатор, 7 магнето етешмәй. Шулай уҡ урында табырға мөмкин булған 12 кубометр ағас материалы ла әҙерләнмәй.

МТС-та әле 8 комбайн усадьбаға килтерелмәгән. «Ҡыҙыл юл», «Пятилетка», «Красный Запорожец», Киров һәм Чкалов исемендәге колхоздарҙа ҡалдырылған комбайндарҙы урындарҙа ғына ремонтларға уйлайҙар. Комбайн хедерҙәрен ремонтлау тураһында уйлаусы ла юҡ. Комбайнер Дауытов тарафынан үҙған йыл «Марс» колхозы баҫыуында ҡалдырылған комбайн хедеренең күп өлөштәре тегеләһе кем тарафынан һүтелеп алынған. МТС-та комбайн ремонтын ҡыҙыулатырға мөмкинлек ҙур. Тик МТС етәкселәре эш барышында бөтә етешһеҙлектәрҙе бөтөрергә, урожай йыйнауға әҙерлеккә конкрет һәм оператив етәкселек итеүҙе тәьмин итергә тейештәр.

Ғ. Ғәйнетдинова.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Благовар районы «Һабансы» колхозында сәсеүлектәр яҡшы тәрбиәләнә.
Һүрәттә: Зәлфирә һәм Зәбирә Байковалар, Сәлихә һәм Фәридә Түләковалар баҫыуҙа кенбағыш утайҙар.
Г. Буравин фотоһы.

Республика МТС-тарында комбайндар ремонтының барышы

(План үтәлеше, 1948 йылдың 15 июненә, процентарҙа)

Аит	100	Стәрлетамаҡ	46	Әбдрәзәҡ	30
Божор	100	Ҡариҙел	46	Арҫлан	30
Ташлыкүл	100	Ярослав	46	Стәрлебаш	30
Дүртөйлө	80	Белоҡатай	45	Ерекле	30
Аксен	75	Урмияз	45	Күгәрсен	30
Шәрип	75	Мәсетле	45	Архангель	27
Байҡы	74	Күрҙем	45	Бәләбәй	27
Подгорный	74	Ҡорос	45	Шаран	26
Мияҡа	71	Суйынсы	45	Үлай	26
Рәжәп	68	Мраҡ	45	Дмитриевка	26
Кушнаренко	67	Сынташтамаҡ	44	Усть-Икин	25
Ҡушйылға	65	Ямады	44	Полянск	25
Ташлы	55	Ҡасәү	43	Ҡарын	24
Октябрь	65	Федоровка	43	Таймаҫ	24
Туймазы	64	Таутәмән	41	Абзан	24
Чапаев	64	Иәркәй	41	Малаяз	23
Маҡар	61	Михайловка	41	Поддуб	23
Ҡалтасы	61	Ҡыйғы	41	Ҡырмыҫҡалы	23
Туҡмаҡлы	59	Ермолаевка	40	Усень-Ивановка	23
Яңауыл	59	Күзәй	40	Ҡалмыҡ	23
Аслыкүл	58	Иәрмәкәй	40	Покровка	23
Иглин	56	Ново-Троицк	40	Һаҡмар	23
Баҡалы	55	Благовар	38	Шишмә	21
Дауләкән	54	Мәсәғүт	38	Зәбельск	20
Шланлы	54	Малаүеҙ	37	Охлебинин	20
Иәнйегет	52	Базан	37	Булгаҡ	20
Бөрө	50	Орлов	37	Баймаҡ	20
Ҡандра	50	Пугачев	36	Теләкәй	19
Краснохолм	50	Борай	36	Һуҡайлы	18
Нуриман	50	Мишкә	36	Андреевка	18
Ишле	50	Имәнлеҡул	36	Учалы	18
Бишбүләк	50	Услы	35	Әбдрәшит	17
Чурай	50	Степановка	35	Ергән	17
Ҡарламан	48	Арҡауыл	33	Һүрән	17
Степной	48	Приют	33	Матрай	17
Елдәр	48	Моторный	33	Байрамғол	14
Байғужа	48	Аҫҡын	32	Байыш	11
Хәйбулла	48	Мрәсем	32	Йылайыр	11
Бүздәк	47	Ҡолайбирҙин	32	Әлмөхәмәт	7
Саҡмағош	47	Калинников	31	Балтаҫ	4
Петровск	46	Дыуан	30	Ямаш	4

Ике МТС-та ике төрлө эш

ДҮРТӨЙЛӨ. (Телефон аша). Ленин орденле Дүртөйлө машина трактор станцияһы урожай йыйнауға әҙерлекте ҡыштан уҡ башланы. Комбайндарға ремонт тракторҙар ремонтланған ваҡытта уҡ алып барылды. Яҙғы сәсеү башланғас, урожай йыйнау машиналарын ремонтлау тағы ла көсәйтелде.

Комбайндар бригадно-узловой метод менән ремонтландылар. Һәр бер бригадаға эш графигы еткерелеп, ул көн һайын тикшерелде. Мастерскойҙа эшселәр араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Шуның һөҙөмтәһендә 18 июнгә 25 комбайндың бөтәһе лә ремонтланып бөттө. Улар хәҙер колхоздарға оҙатылдылар.

Урожай йыйнауҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн көрәшкән МТС коллективе бының менән генә сикләнмәй. Ҙур ремонт талап итеүсе арҡаһында үткән йылдарҙа файҙаланылмаған комбайндарҙы төҙәтеү эше алып барыла. Уларға ла оҙаҡламай ремонт тамамланасаҡ.

Ә ошо уҡ районың Байыш МТС-ында бөтөнләй икенсе хәл. Бында ремонтланырға тейеш булған 17 комбайндың береһе лә әҙер түгел. МТС директоры Ғәйетколов, ике комбайн ремонтланған, тип сводка бирҙе. Ләкин уларҙың моторҙары эшләмәй, ашлыҡ һуғыу өлөштәре төҙәтелмәгән.

Запас частәр етешмәү тураһында бында күп һөйләйҙәр. Ләкин уларҙы Бөрөнән барып алыусы юҡ. Был эш өлкән механик Кәримовҡа тапшырылған, ләкин ул трактор бригадаларында гастроллек итеп йөрөүҙән бушамай. Комбайн буйынса механик иптәш Сафин дә үҙенең төп бурысы менән ҡыҙыҡһынмай.

Ремонтсылар араһында хеҙмәт ойоштороу мәсьәләләре менән шөғөлләнеүсе кеше юҡ. Графиктар бирелмәй һәм уларҙың үтәлешенә контроль яһалмай. Мөһим эш үҙ ағышына тапшырылған. Байыш МТС-ында бындай тарҡаулыҡҡа ҡасанға тиклем юл ҡуйылыр?

Ғ. Хөснөтдинов.

Урожайҙы ваҡытында һәм юғалтыуһыҙ йыйнау өсөн

«Беренсе Май» колхозы — Шаран районының орлоҡсолоҡ хужалығы. Был колхоз быйыл 771 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары үҫтерә.

Колхозсылар иптәш Сталинға яҙған хатта бирелгән вәғәҙәне үтәү өсөн тырышып эшләйҙәр, бөтә майҙанда ла мул урожай алыу өсөн көрәшәләр. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү даими рәүештә алып барыла.

Колхоз ашлыҡтарҙы үҙ ваҡытында, юғалтыуһыҙ йыйнап алыуға әҙерләнә. 8 урғыс, 6 елгәргес, 4 сортировка, триер, ҡатмарлы һәм ябай молотилкалар сифатлы итеп ремонтланды. 48 арба, 64 фургон әҙерләнде. Ике урында ямалы ырҙын, 2 сушилка эшләнде.

Ғ. Ноғманов.

Чкалов исемендәге колхозда

Яңауыл районы. Чкалов исемендәге колхозда 873 гектар һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлеге тәүге тапҡыр, ә 246 гектар ужым сәсеүлеге икенсе тапҡыр утаалды.

Колхоз урожай йыйнауға әҙерлекте лә тәүәлләне. Тимерселәрҙән Ираев, Метков, Глызин иптәштәр 7 урғыс, 5 молотилка, 5 елгәргес машинаны ремонтлап ҡуйҙылар. Колхоздың башҡа инвентарҙәре лә етеш. 55 арба, 21 рыдван, 55 турпыша, 80 дана салғы һәм башҡалар әҙер. Шулай уҡ ямалы ырҙындар һәм сушилкалар эшләнде. Хәҙер колхозда урожай йыйнауҙың эш планы төҙөлә. Урожай йыйнауҙа 125 колхозсы, 70 ат, 15 эш үгеҙе ҡатнашасаҡ. Бөтә майҙан 19 көн ваҡытта йыйналып бөтәсәк. Колхоз государствоға иген тапшырыу планын 10 октябргә үтәргә һәм Октябрь революцияһының 31 йыллығы көнөнә ауыл хужалығы йылының бөтә эштәрен тамамларға планлаштыра.

М. Фәтихова.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советенең икенсе сессияһы

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ ИПТӘШ КОШЕЛЕВ АЛЕКСЕЙ ЛЬВОВИЧТЕ БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕНЕҢ УРЫНБАҪАРЫ ИТЕП БИЛДӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ УКАЗЫН РАҪЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарар итә:

Иптәш Кошелев Алексей Львовичте Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары итеп раҫларға:

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ ИПТӘШ ҒӘЛИЕВ ҒӘЛИЯН ШӘЙХЕТДИН УЛЫН БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕНЕҢ УРЫНБАҪАРЫ ИТЕП БИЛДӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ УКАЗЫН РАҪЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарар итә:

Иптәш Ғәлиев Ғәлиян Шәйхетдин улын Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары итеп раҫларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ ИПТӘШ ӘХМЕРОВ БИКТИМЕР ҒӘЛИУЛЛА УЛЫН БАШҠОРТ АССР-ы МИНИСТРҘАР СОВЕТЕ ПРЕДСЕДАТЕЛЕНЕҢ УРЫНБАҪАРЫ ИТЕП БИЛДӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ УКАЗЫН РАҪЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарар итә:

Иптәш Әхмеров Биктимер Ғәлиулла улын Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы Председателенең урынбаҫары итеп раҫларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ ИПТӘШ ВӘЛИЕВ САМАТ ФӘТТӘХ УЛЫН БАШҠОРТ АССР-ы ФИНАНС МИНИСТРЕ ИТЕП БИЛДӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ УКАЗЫН РАҪЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарар итә:

Иптәш Вәлиев Самат Фәттәх улын Башҡорт АССР-ы финанс Министре итеп раҫларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ БАШҠОРТ АССР-ы УПРАВЛЕНИЕЛӘРЕ НАЧАЛЬНИКТӘРЕН БИЛДӘЛӘҮ ТУРАҺЫНДАҒЫ УКАЗДАРЫН РАҪЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһының Верховный Советы ҡарар итә:

Башҡорт АССР-ы Управлениеләре начальниктәрен билдәләү тураһында Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Указдарын раҫларға:

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге искусство эштәре Управлениеһенең начальниге итеп — Кузыев Рамазан Усман улын;

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге төҙөлөш материалдары промышленносе Управлениеһенең начальниге итеп — Әминев Әкбәр Закир улын;

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениеләре эштәре буйынса Управлениеһенең начальниге итеп — Нәзиров Мөбәрәк Ыйһанша улын;

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы эргәһендәге кинофикация Управлениеһенең начальниге итеп — Ғафаров Исмәғил Мөхәмәт улын.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

ДЕПУТАТТАР П. И. КАМЕНЕВТЕ ҺӘМ Н. М. ҒӘРӘЕВТЕ БАШҠОРТ АССР-ы ВЕРХОВНЫЙ СОВЕТЕ ПРЕЗИДИУМЫНЫҢ ЧЛЕНДӘРЕ ИТЕП ҺАЙЛАУ ТУРАҺЫНДА

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы ҡарар итә:

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумына член итеп һайларға:

Каменев Петр Ильичте — Ҡыйғы һайлау округынан депутат.

Ғәрәев Нурғәли Миңлеғәли улын — Янғыҙҡайын һайлау округынан депутат.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе **Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.**

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретаре **Ә. БИКТИМЕРОВ.**

Өфө, 16 июнь 1948 йыл.

Үҙҙәренең политик белемдәрен күтәрәләр

Белорет ҡала Советенең башҡарма комитетында эшләүсе 45 коммунистең 75 проценте партия сафына Ватан һуғышы йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа ғына ингән йәш коммунистар. Уларҙың күбеһе бүлек мөдирҙәре булып һәм башҡа шундай яуаплы эштәрҙә эшләйҙәр. Шуның өсөн дә ҡала Советенең тәүге партия ойошмаһы коммунистарҙың идея-политик кимәлдәрен күтәреүгә ныҡлы иғтибар бирә.

Коммунистарҙың барыһы ла политик уҡыу селтәренең төрлө формаһы менән солғап алынған. 15 кеше партия тарихын үҙ алдына өйрәнә. Политик әҙерлектәре түбәнерәк булған коммунистар ВКП(б) тарихын, Ленин һәм Сталин биографияһын өйрәнеү түңәрәктәрендә уҡыуға йәлеп ителделәр. Политик уҡыуҙарҙан тыш, ҡала Советы секретаре Зимина, исполком работниктәренән Мулюкин һәм тағы ла бер нисә иптәш урта мәктәптә ситтән тороп уҡый.

Ҡала Советенең үҙендә һәм уның бүлектәрендә эшләүсе партияһыҙ хеҙмәткәрҙәр өсөн планлы рәүештә лекциялар ойоштора­быҙ. Лекциялар уҡыу эшенә ҡала Советенең яуаплы работниктәрен һәм башҡа әҙерлекле коммунистарҙы йәлеп итәбеҙ.

Ҡала Советы коммунистарына һәм партияһыҙ активҡа политик тәрбиә биреү сараларын көсәйтеү — аппараттың эшен ҡырҡа яҡшыртыуға мөмкинлек бирҙе. Ҡала Советенең хеҙмәтсәндәр менән бәйләнеше ныҡыны. Граждандарҙан килгән жалобаларҙы ҡарап, хәл итеү һәм уларҙың сигналдарына ваҡытында иғтибар биреү эштәре яҡшырҙы.

Белорет ҡала Советенең партия ойошмаһы массовый-политик эште тағы ла яҡшыртыу буйынса хәҙер ныҡлы эш алып бара.

С. Әхмәтшин,

Белорет ҡала Советы башҡарма комитеты тәүге партия ойошмаһының секретаре.

Советтәр Союзында

Мәскәү: Совет майҙаны. (Май, 1948 йыл). Н. Грановский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Һирәк осрай торған китап

ЛЕНИНГРАД. (ТАСС). Ленинградтың иҫке китаптар һатып ала торған магазины һирәк осрай торған, түбәндәгесе исемле мәҡәләләр йыйынтығын һатып алды: «Беҙҙең хужалыҡ үҫешен характерлаусы өсөн материалдар», бында В. И. Лениндең иң элек ижад иткән хеҙмәттәренең береһе, К. Тулин тигән йәшерен исем менән сығарған «Народниклыҡтың экономик йөкмәткеһе һәм Струве әфәнде китабында уны тәнкитләү», тигән мәҡәләһе урынлаштырылған.

Был китап, Петербургтың легаль типографияһында, 1895 йылда, иҫке мең дана тираж менән басылып сыҡҡан. Йыйынтыҡ батша хөкүмәте тарафынан конфискацияланып, яндырылған булған. Петербургтағы һәм башҡа ҡалалардағы социал-демократтар араһында йәшерен рәүештә таралған, барлығы 100-гә яҡын китап һаҡланған.

Библиографик һирәк осрай торған был китаптар Салтыков-Щедрин исемендәге публичный библиотекаға тапшырыла.

„Агитатор библиотечкаһының" беренсе китабы

Госполитиздат тарафынан сығарыла торған «Агитатор библиотечкаһының» 11 номерлы беренсе китабы басылып сыҡты. Был китапҡа М. И. Калининдең 1942 — 1944 йылдарҙа, Мәскәү ҡалаһының партия работниктәре кәңәшмәләрендә һөйләгән телмәрҙәре, һәм фронт агитаторҙары менән үткәргән беседалары индерелгәндәр.

Яҡын араға: «Большевистик агитацияның төп черталары», «Агитатор теле тураһында», «Беседа үткәреүгә нисек әҙерләнергә», «библиотечкаға» ингән башҡа китаптар басылып сығасаҡ.

Автомашиналар ҡарауаны Ҡара-Ҡомға сыкты

АШХАБАД. (ТАСС). Ашхабадтан Ҡара-Ҡом тапкаланы кеүәтле автомашиналар колоннаһы сыҡты. Уларҙың береһенә, кем сахраның үҙәгендә төҙөлә торған электр станцияһы өсөн 18 тонналы дизель тейәлгән. Яңы электр станцияһы Дарваза көкөрт рудниктарына энергия бирәсәк.

Дизелде алып барған автомашина Ашхабадтағы «Ҡара-Ком рудоуправлениеһенең» мастерскойҙарында ҡоролған.

Ҡалған бик етә тонналы автомашиналарға яғыулыҡ, дизель өсөн запас частар, һыу һәм аҙыҡ-түлек тейәлгән.

Машиналарҙы юлда хеҙмәтләндереү өсөн махсус самолет билдәләнгән.

Газ менән эшләй торған автомобилдәр

СТАЛИНО. (ТАСС). Донбасста бензин менән йөрөй торған автомобилдәрҙе газ менән йөрөтөүгә күсереү эше ҡайтанан яңыға баҫтырылды. Был, һуғыш ваҡытында туҡталып торғайны. Бының өсөн яңы автомашиналарға бензин бактары менән бергә ҡыҫылған газ тултырыу баллон һәм газ редукторы ҡуйыла. Ялыҡлы өсөн коксохимик производствоның отходы файҙаланыла. Горловкала һәм Макеевкала газ тултырыу өсөн ике станция яңыға баҫтырылды. Ағымдағы йылдың аҙағына Сталино өлкәһендә газ менән эшләй торған машиналарҙың һаны 300-гә еткереләсәк.

СССР Сит ил Эштәре Министерствоһында

Дунай конференцияһы тураһында

Сит ил Эштәре Министрҙәре Советенең Нью-Йоркта 1946 йылдың 12 декабрендә сығарған ҡарарына ярашлы рәүештә, Дунайҙа пароходтар йөрөшө режиме тураһында яңы конвенция төҙөү өсөн конференция саҡырылырға тейешле ине. Был конференция составында Дунай буйы государстволары — СССР, Украин ССР-ы, Румыния, Болгария, Чехословакия, Югославия, Венгрия вәкилдәре һәм түбәндә күрһәтелгән государстволар — Сит ил Эштәре Министрҙәре Советенең члендәре: АҠШ, Великобритания һәм Франция вәкилдәре ҡатнашырға тейеш.

Хәҙерге ваҡытта СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре араһында ошо конференцияны 30 июлдә Белградта саҡырыу тураһында килешеүгә ирешелде. Бер үк ваҡытта Австрияның был конференцияла, кәңәш биреү хоҡуҡы менән, ҡатнашыуы тураһында һөйләшеп килешелде.

Ауыл депутаттарына ярҙамға

Даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар

Урындағы Советтарға һайлауҙарҙан һуң республикабыҙҙың ҡала, район, поселка һәм ауыл Советтарында 18057 членды торған 5050 даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар төҙөлдө.

Даими хәрәкәт итеүсе комиссияның председателе ҡағиҙә буйынса шул уҡ Советтең депутаты булырға тейеш. Депутаттар аҙ булған ауыл Советтарында комиссияларға член итеп актив йәлеп ителә. Район Советтәре эргәһендәге даими комиссияларҙың председателдәре лә һәм члендәре лә депутат булырға тейеш.

Ләкин ҡайһы бер район Советтәре Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советенең һәм Верховный Совет Президиумының был тәңгәлдә биргән директиваларын боҙалар. Район Советы эргәһендә төҙөлгән комиссияларға член итеп депутат булмаған кешеләрҙе ҡуялар. Миҫалға Әбйәлил, Благовещен, Ҡалтасы һәм Хәйбулла райондарын алырға була.

Был район Советтәре исполкомдары даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙы төҙөү менән генә сикләнгәндәр, ә уларҙың практик эштәренә әһәмиәт бирмәгәндәр. Улар даими комиссияларҙың урындағы совет органдарының эштәренә ярҙам итеү өсөн ойошторолғанлығын иҫтәренән сығарғандар, комиссия етәкселәре менән инструктив кәңәшмә үткәрмәгәндәр һәм уларға комиссияның төп бурыстарын аңлатмағандар. Һөҙөмтәлә ҡайһы бер комиссиялар эште нәмәнән башлап алып китергә белмәйҙәр.

Бындай етешһеҙлектәрҙе башҡа райондарҙа ла осратып була. Сөнки райондарҙа күп депутаттарҙың эште нәмәнән башлап ебәреү, нисек итеп ойоштороу тураһында һорау биреүҙәре бының асыҡ миҫалы булып тора. Был һорауҙарға яуап рәүешендә түбәндәге эш тәртибе тәҡдим ителә:

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының урындағы Советтәре эргәһендә финанс-бюджет, ауыл хужалығы, урындағы промышленность, сауҙа һәм кооперация, һаулыҡ һаҡлау, мәғариф һәм культура-ағартыу, коммуналь-торлаҡ, юл төҙөлөшө һәм башҡа эш тармаҡтары буйынса комиссиялар төҙөлә. Был комиссиялар үҙҙәренең эштәренә актив эшселәрҙе, колхозсыларҙы, интеллигенцияны һәм общество ойошмаларының вәкилдәрен яҡындан йәлеп итәләр.

Даими хәрәкәт итеүсе комиссияларҙың бурыстары урындағы Совет һәм уларҙың исполкомдары алдында торған хужалыҡ һәм культура-ағартыу эштәрен, партияның ҡарарҙарын срокта еткереп үтәүҙә практик ярҙам итеүҙән тора. Улар предприятие, учреждение, колхоз һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының эштәрен контролгә алалар, һайлаусыларҙың законлы интерестәрен күҙәтәләр, уларға ҡайһы бер мәсьәләләр буйынса практик ярҙам күрһәтәләр, хеҙмәтсәндәрҙең ҡиммәтле тәҡдимдәрен һәм теләктәрен йыйнайҙар, ул тәҡдимдәр буйынса практик саралар билдәләйҙәр, сессияға кәң тәртибе әҙерләйҙәр, ҡушма доклад менән сығыш яһайҙар.

Даими хәрәкәт итеүсе комиссиялар урындағы Советтарҙың ҡарарҙары һәм юғары ойошмаларҙан килгән директивалар менән таныш булырға, алда торған эштарҙың үҙенсәлеген бөтә яҡлап тикшереп, уларҙы уңышлы үтәү юлдарын ныҡлы өйрәнеп сыҡҡас, һәр бер эш төрөнөң үтәләсәк сроктарын һәм уларҙы үтәүҙә яуаплы кешеләрҙе билдәләп эш планы төҙөргә тейештәр. Эш планына хужалыҡ ептәнән контроль, урындағы бюджеттең үтәлешен тәьмин итеү, колхоздарҙа административ расходтарҙы ҡыҫҡартыу, колхозсыларҙың хеҙмәт доходын күтәреү, хеҙмәтсән киң массаның материаль көн-күрешен артабан яҡшыртыу, культура-ағартыу эштәрен халыҡ талабына яуап бирерлек итеп ойоштороу һәм башҡа мөһим мәсьәләләрҙе индерергә кәрәк. Төҙөлгән планды аныҡ үтәү өсөн депутаттарҙың ныҡышмалы рәүештә эшләүҙәре һәм был өлкәлә урындағы активте тағы ла ныҡырак ылыҡтырыуҙары талап ителә.

Г. Солтанов,

Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советенең өлкән инструкторы.

Н. А. Римский-Корсаков

(1844—1908)

Бынан ҡырҡ йыл элек, 1908 йылдың 21 июнендә, бөйөк рус композиторы, «булдыҡлы төркөмдөң» төп ҡатнашсыларынан береһе, Николай Андреевич Римский-Корсаков үлде. Ул рус халҡының ижад геніен, рус искусствоһының үҙенсәлеген һәм гүзәллеген бөтә донъя күләмендә данлаусы кешеләрҙең сафында тора. Римский-Корсаковтың: «Снегурочка», «Батша кәләше», «Псковитянка», «Садко», «Рождество алды төнө», «Май төнө», «Салтан батша тураһында әкиәт» һәм башҡа опералары — рус опера искусствоһының ысын ынйылары булып иҫәпләнәләр. Уның «Шәһризада», «Испан каприччиоһы» һәм башҡа симфоник иң яҡшы әҫәрҙәре донъя концерт эстрадаларында яңғырай.

Н. А. Римский-Корсаковтың ғүмер юлы — тыуған искусствоға йән-тән менән бирелеп хеҙмәт итеүҙең үрнәге булып тора. Ул 1844 йылдың 18 мартында, Тихвин ҡалаһында тыуған. Ата-әсәһе уны диңгеҙ офицерлегенә әҙерләргә уйлайҙар: ул Петербургтың Диңгеҙ корпусын тамамлай. Ләкин кесе йәштән үк музыка менән — айырыуса М. И. Глинка музыкаһы менән — ҡыҙыҡһыныу Николай Андреевичтең иң ҡайнар яратҡан нәмәһе була. Бородин, Мусоргский, Кюи һәм музыкаль тәнҡитсе Стасовтар тупланған Балакирев түңәрәге менән танышыу 17 йәшлек моряктең артабанғы тормош юлын билдәләй. Ул диңгеҙ хеҙмәтен ташлап, Балакирев етәкселегендә, музыкаль композиция нигеҙҙәрен өйрәнә башлай һәм 70-се йылдар башында Петербург консерваторияһының профессоры була.

Балакиревтең «булдыҡлы төркөм» исемле түңәрәгендә 60-сы йылдарҙағы демократик хәрәкәт менән ныҡ бәйләнгән искусствоның прогрессив һәм реалистик принциптәре урынлаштырыла. Улар музыкаль искусствоның халыҡсанлығын һәм дөрөҫлөгөн алға һөрәләр, үҙ музыкаларының нигеҙенә рус халыҡ моңон һәм тормошон һалырға тырышалар һәм ул саҡта ныҡ таралған итальян музыкаһы алдында ҡолдарса баш эйеүгә ҡаршы ҡаты көрәш алып барҙылар.

Римский-Корсаков ҡаты ныҡышмалыҡ менән композиция оҫталығына эйә булды. Ул оркестрҙе, гармонияны, опера формаһын иң киткес белеүсегә әйләнә, рус музыканттарының бер нисә быуынын аҡыллы тәрбиәләүсе була. Петербург консерваторияһында ул ҡырҡ йыл буйы күренекле профессор булып эшләне, Лядов, Аренский, Гречанинков, Ипполитов-Иванов кеүек ҙур композиторҙарҙы, милли музыкаль культураның классиктәрен — Лысенко, Спендиаров, М. Баланчивадзе һәм башҡаларҙы тәрбиәләп үҫтерҙе.

Н. А. Римский-Корсаков бөтә ғүмере буйына Балакирев түңәрәгенең, Белинский һәм Герцен, Чернышевский һәм Добролюбов демократик эстетикаһына нигеҙләнгән, прогрессив ваҫыяттарына тоғролоҡ һаҡлай. 1905 йыл Консерваторияла бюрократик етәкселеккә ҡаршы студенттәр хәрәкәте башланғас, Римский-Корсаков ҡыйыу рәүештә революцион студенттәрҙе яҡлау яғына баҫа, шуның өсөн уны профессорҙар составынан сығаралар.

Римский-Корсаков операларында, улар тарихи йәки хыял-әкиәт ҡабығына тышҡы яҡтан төрөнгән булһалар ҙа, үҙе йәшәгән замандың йәнле, үткер мәсьәләләре күп тапҡырҙар үҙҙәренең сағылышын таптылар. Уның Пушкин әкиәте буйынса яҙған, алйот һәм булдыҡһыҙ ятаған-батша Додондан көлгән «Алтын әтәс» операһы, общество тарафынан рус самодержавиеһенә асы сатира тип ҡабул ителде. Шуға күрә «Алтын әтәс» операһын ҡуйыуға цензураның ҡаршы төшөүе көтөлмәгән хәл түгел.

Римский-Корсаковтың бөтә опера мираҫтары рус халҡының гүзәл әкиәт һәм йыр ижады рухы менән һуғарылғандар. Ләкин был музыкаларҙа ҡараңғы, күңел төшөнкөлөгөнә бирелгән моңдарҙың эҙе лә юҡ. Уның әкиәт-операларында рус тәбиғәтенең кеүәтле көсө йәнле итеп кәүҙәләнелгән. Уларҙа йә төньяҡ ҡышының күҙ сағылдырғыс яҡтылығы һәм сафлығы, йә яҙ ҡояшының тормош биреүсе көсө, йә шашҡын һәм тынғыһыҙ диңгеҙ стихияһы, йә ҡараңғы ҡара урмандар йәнле булып күҙ алдына баҫалар. «Миң халыҡ ижадын тыңлайым һәм ул йырлаған йәки әйтеп биргән нәмәләрҙе үҙ ижадымдың нигеҙенә алам», тип яҙҙы Римский-Корсаков аҙаҡ был хаҡта. Былай үҙ халыҡ музыкаһы менән оҫта ҡушыла белеүҙе бик аҙ композиторҙарҙың искусствоһында осратырға мөмкин.

Шуның менән бер үк ваҡытта, Римский-Корсаков музыка өлкәһен гүзәл яңы яңғырауҙар, оркестрҙарҙың яңы алымдары менән дә байытты. Ләкин был уның өсөн мауығыу маҡсаты түгел ине. Уның тарафынан музыкаль туҡымаға индерелгән һәр бер яңылыҡ — реаль тормошто сағылдырыу сараһы булды.

Россияның ялҡынлы патриоты Римский-Корсаков славян халыҡтарының музыкаһына һәм поэзияһына ҙур ҡыҙыҡһыныу менән ҡарай; Гоголдең повестарында тасуирланған украин әкиәте-көйҙәре композитор тарафынан «Май төнө», «Рождество алды төнө» операларында илһамланып сағылдырылалар; «Пан-воевода» операһында поляк милли көйҙәре, «Млада» һәм «Серб хыялдары» операһында — көнбайыш славяндарҙың көй һәм әкиәттәре яңғырайҙар. Ул ялҡынлы художник ентеклеге менән көньяҡ халыҡтарының моң һәм ритмдарын өйрәнеп, «Садко», «Алтын әтәс» операларында һәм «Шәһризада», «Антар» симфонияларында Закавказье һәм Урта Азия халыҡтарының ысын милли музыкаларына яҡын торған, көньяҡтың үлемһеҙ лирикалары биттәрен тыуҙырҙы.

Н. А. Римский-Корсаков беҙгә бик бай мираҫ ҡалдырҙы. Уның ҡәләме менән 15 опера, 3 симфония, 100-гә яҡын романс һәм йырҙар, киң танылған күп кенә симфоник пьесалар кантата, камераль ансамблдәр яҙылған, халыҡ көйҙәре эшләнгән. Шулай уҡ беҙ, уның яҡын дуҫтары эшләп бөтөргә өлгөрмәгән күп кенә әҫәрҙәр, композиторҙың талмаҫ тырышлығы арҡаһында, ишетә алдыҡ. Мусоргскийҙең «Борис Годунов» һәм «Хованщина», Бородиндең «Кенәз Игорь», Доргомыжскийҙең «Таш ҡунаҡ» кеүек, гүзәл опералары һәм башҡалар уның тарафынан яңып бөтөлдөләр йәки ер яңынан редакторландылар.

Римский-Корсаков музыкаларының ярымлы сафлығы һәм асыҡлығы, йомарт биҙәклелеге һәм эпик булыуы беҙҙән осор кешеләрен һоҡландыра.

И. Нестьев.

Октябрҙең 31 йыллығын производство еңеүҙәре менән ҡаршылайыҡ!

Өлгө күрһәтәләр

Өфө телефон аппараттары заводы 10 июнгә ярты йыллыҡ планын тамамлап, йылдың икенсе ярты[һы] иҫәбенә бер нисә йөҙ мең һумлыҡ продукция эшләп сығарҙы.

Коллектив продукцияның үҙенә төшөү хаҡын түбәнәйтә барып, алты айҙа ике миллион һумдан артыҡ экономия бирергә йөкләмә алғайны. Ул уны дүрт ай эсендә үтәп, 2 миллион 57 мең һум экономия яһаны.

Быйыл яҡшы эшләүҙә инженер-техник работниктәр һәм конструкторҙар ҙур ярҙам күрһәтте. Мәҫәлән, инженер Алябик конструкцияһы менән үҙләштерелгән индуктор продукцияны арттырып сығарыуға ҙур сара булды. Заводтың баш конструкторы иптәш Брант яңы телефон станциялары конструкцияһын уйлап сығарғайны. Быны үҙләштергәндән һуң эшселәрҙең хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде, продукцияның сифаты яҡшырҙы һәм үҙенә төшөү хаҡы байтаҡ түбәнәйтелде.

Социалистик ярышта күренекле урынды биш йыллыҡ һәм унан да күберәк норма үтәүсе стахановсылар алып килә. Уларҙың сафы көндән-көн үҫә. Хәҙер заводтың 35 эшсеһе 1950—1953 йылғы программа иҫәбенә эшләйҙәр.

Стахановсыларҙың эш темпы айҙан-айға күтәрелә. Шнуровщица Фәхретдинова ғинуар айында заданиене 192 процентка үтәгән булһа, март, апрель айҙарында дүртәр, ә бөгөнгә көндә унан да күберәк норма бирә. Сборщица Суркова, слесарь-инструментальщик Александров, токарҙар Булатов, Полежаев иптәштәр Фәхретдинованан артта ҡалмаҫҡа тырышып, үҙҙәренең эштәрен күп яҡшырттылар һәм ҙур уңыштарға ирештеләр.

Начальниктәре Красиков, Гершов, Рыбиков, Ковальский иптәштәр булған цехтар юғары темпта эшләп, заданиеләрен систематик үтәп баралар. Йыллыҡ планды срогынан алда үтәү өсөн көрәштә был цехтар башҡаларға өлгө күрһәтәләр.

А. Имангулов.

Пландан тыш

ИШЕМБАЙ. «Ишембайнефть» трестының икенсе промыселе коллективе (директоры иптәш Передов) һуңғы айҙа ныҡышмалы эшләп, алдынғылыҡты тағы ла яулап алды. Промыселдең участкаларында, бригадаларында һәм цехтарында эске мөмкинлектәр эҙләп сығылды, юғарылатылған яңы йөкләмәләр алынды. Нефтселәр йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәү, илебеҙгә пландан тыш нефть биреү бурысын ҡуйҙылар. Коллектив ошондай энтузиазм менән эшләп, май айының нефть һәм газ сығарыу планын арттырып үтәне.

Механик мастерскойы ярты йыллыҡ заданиеһен май айының тәүге декадаһында уҡ тамамлағайны. Коллектив үҙенең йыллыҡ программаһын 1 октябргә үтәргә һүҙ бирҙе.

Трестың газ-компрессор хужалығы эш темпын июнь айында тағы ла күтәрә төштө. Коллектив йыллыҡ планды Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығына тамамлау өсөн көрәшә.

Сталин исемендәге машиналар төҙөү заводы коллективе һуңғы айҙа пландан тыш 200 мең һумлыҡ продукция сығарҙы.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Арматурсыларҙың уңыштары

Өфө паровоздар ремонтлау заводының арматур цехы коллективе сталинсе тимер юлсылар көнөн производствола яңы уңыштар менән ҡаршылау өсөн көрәшә.

Завод коллективе тимер юлсылар көнө хөрмәтенә стахановсы вахтаға баҫып смена-тәүлек заданиеһен 200 процентка үтәүҙе бурыс итеп ҡуйҙы. Айырым стахановсылар йәш эшселәрҙең квалификацияһын күтәреүгә йөкләмә алдылар. Мәҫәлән, токарь Тепкин, Сергеев һәм Григорьев иптәштәрҙе йәмендә 3-сө разряд эшселәре итеп әҙерләргә булды. Стахановсы иптәш Никитин үҙ станогында Ефименконы токарлеккә өйрәтте. Бер йыл эсендә ул 12 йәш эшсене токарлек эшенә өйрәтте.

Токарь иптәш Мартынов етәкселек иткән йәштәр бригадаһы юғары темп менән эшләй. Бригада члендәренән Е. Томышев, Е. Чапликов һәм бригадир үҙе хәҙер биш йыллыҡтың өсөнсө йылы иҫәбенә продукция эшләп сығаралар.

Цех коллективе 7 айлыҡ эш планын 20 июлгә, ә йыллыҡ программаны Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллығына тамамларға йөкләмә алды.

М. Сәхи.

Оло юлдар төҙөкләндерелә

Ғафури районында быйыл оло юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса күп кенә эштәр башҡарыла. Беренсе нәүбәттә Красноусол — Аҡкүл араһындағы юл яҡшы итеп төҙөләсәк.

Районның юлдарында 29 погон метр оҙонлоғонда яңы күпер һалыу, юлға 1850 кубометр ҡырсын сығарыу, 526 кубометр ағас әҙерләү һәм ташыу күҙҙә тотола. Ике мең кубометрҙан артыҡ ер эштәре башҡарыласаҡ.

Алдынғы колхоздар быйыл юлдарҙы төҙөкләндереүгә яҙғы баҫыу эштәре тамамланмаҫтан элек үк әҙерләнә башлағайнылар. «Красный остров», «Ударник», Молотов, Карл Маркс, Суворов исемендәге клхоздар был эшкә айырыуса әһәмиәт бирҙеләр. Быяла заводы дирекцияһы юл эшенә махсус бригадалар ойоштороп сығарҙы.

Юлдарҙы төҙөкләндереү буйынса күп кенә эштәр үткәрелде инде. Бүленгән эшселәр һәм колхозсылар тарафынан юлға 200 кубометрҙан артыҡ ҡырсын сығарылды, 380 кубометр ағас әҙерләп ташылды, 500 кубометр ер эштәре башҡарылды. Саскүлдә яңы паром эшләнеп бөтөү алдында тора. Бөгөнгө көндә юл төҙөлешендә 150 кеше, 17 ат, унлап автомашина эшләй.

Ағиҙел йылғаһы Ғафури районын икегә айырып тора. Яҙғы-көҙгө ваҡыттарҙа район үҙәге хеҙмәтсәндәре башҡа райондарға бик оҙаҡ сыға алмай, йәки колхозсылар район үҙәгенә килә алмай борсола торғайнылар. Хәҙер район хеҙмәтсәндәре был ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сыҡтылар. Быяла заводының һәм район юл төҙөү бүлеге етәкселәренең инициативаһы менән Ағиҙел аша яңы понтон күпере һалынды.

Районның меңәрләгән колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары Ишембай — Ермолаевка тимер юлы төҙөлешендә лә ойошҡан рәүештә эшләйҙәр.

Иәғфәр Ғәлиев.

Удар айлыкта

СТӘРЛЕБАШ. Районның колхоздары юлдар, күперҙәр төҙөү һәм ремонтлау айлығына ҡушылдылар. Айлыҡта районда 140 километр юлға, 15 күпергә ремонт үткәрелергә тейеш. Был эштәрҙе срогынан алда тамамлау өсөн колхоздар юл төҙөлешенә ойошҡан рәүештә сыҡтылар. Хәҙер 50 километр юлға һәм 6 күпергә ремонт яһалды. «За родину», «Аҡ түбә», «Күндрәк», «Шишмәле тау» һәм Салауат исемендәге колхоздар үҙ участкаларында эште айырыуса яҡшы ойоштороҙолар, бында эш графиге уңышлы үтәлә.

ИШЕМБАЙ—ЕРМОЛАЕВКА ТИМЕР ЮЛ ТӨҘӨЛЕШЕНДӘ

Ишембай — Ермолаевка тимер юл төҙөлешендә.

Мәләүеҙ районы «Золотой колос» ауыл хужалығы артеле члендәре 40 көндә 9800 кубометр ер ҡаҙырға тейештәр. Улар бирелгән заданиене срогынан алда үтәү өсөн көрәшәләр. Киң йәйелдерелгән социалистик ярыш һөҙөмтәһендә был коллектив намыҫлы хеҙмәт өлгөләре күрһәтә. Түгә[illegible]

Һүрәттә: «Золотой колос» ауыл хужалығы артеле члендәре эштә (өҫтә). Алғы планда колхоздың алдынғы кешеләре (һулдан уңға) — И. П. Кубайцев, Н. С. Лазерев, А. Г. Сычкова һәм Е. И. Посадская. Улар көндәлек норманы 120—150 процентка үтәйҙәр.

В. Жданов фотоһы.

Заданиеләр алдынғы колхоздар иҫәбенә генә үтәлә

Стәрлетамаҡ районынан Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙөүҙә 100 колхоз эшләй. Тырышып эшләү һөҙөмтәһендә Карл Маркс, 1 Май исемендәге, «Маяк» һәм «Яңы ауыл» колхоздары ҡуйылған заданиеләрен инде үтәп тә сыҡтылар.

Трассала һәр көндә бер нисә мең кубометр ер эштәре башҡарыла. Заданиеләр айырым көндәрҙә 110—120 процентҡа тиклем үтәлә.

Ләкин шуны әйтергә кәрәк, был үтәлеш айырым алдынғы колхоздар иҫәбенә генә. Юлда эшләүсе 100 колхоздың әле 50-һе генә заданиеләрҙе үтәй, ә ҡалған колхоздар улар ышығында йәшәйҙәр. «Сулпан», «Пахарь» колхоздары әле заданиеләрҙе 20-30 процентка генә үтәнеләр.

Районның 23 колхозы эшсе һәм тартыу көстәрен трассаға сығарыуын тәьмин итмәне. Мәҫәлән, «Пролетарий» колхозы юлға 70 урынына 50, «Новый быт» колхозы 42 урынына 17 кеше генә сығарҙы. Ә «Рот фронт», «Искра» колхоздары иһә бөгөнгә көнгә тиклем юлға бер генә кеше лә һәм бер генә ылау ҙа сығарғандары юҡ.

Ғ. Ибраһимов. (Үҙ хәбәрсебеҙ).

Ярышып эшләү һөҙөмтәһендә

Маҡар районының тимер юл төҙөлешендә 590 кеше һәм 120 ат ҡатнаша. Төҙөүселәр араһында социалистик ярыш киң йәйелдерелде. Һөҙөмтәлә район көнөнә 1240 кубометр ер эше башҡарыу заданиеһен 2000—2200 кубометр итеп үтәй.

«Красная Москва» колхозының иптәш Кучин етәкселек иткән бригада члендәре һәр көндә өсәр норма бирәләр.

Юл төҙөү эшен 22 июнгә тамамлау маҡсатында Маҡар районы трассаға тағы 450 кеше һәм 40 ат ебәрҙе.

Саҡырыуға ҡушылып

ЕРМОЛАЕВКА. (Телефон аша, махсус хәбәрсебеҙҙән). Мәләүеҙ районы колхозсыларының заданиеләрҙе срогынан алда үтәргә саҡырып яһаған мөрәжәғәттәрен Көйөргәҙе районы колхозсылары хуплап ҡаршыланылар.

Трассала хеҙмәт күтәрелеше арта бара. «Ҡыҙыл шар» колхозы члендәре көн да 144 урынына 300—350 кубометр ер эштәре башҡаралар. Комсомолец Зәфәр Иосопов 3 кубометр урынына 6 кубометр ер ҡаҙый. «Ҡыҙыл Урал», «Яңы тормош» колхоздары члендәре заданиеләрҙе 140—160 процентка үтәйҙәр.

«Красная Нива» колхозы члендәре Василий Барановский, Николай Рябов, Константин Буранов һәм Григорий Ежов—дүртәһе бергә эшләп көнөнә 40 кубометрға тиклем ер ҡаҙыйҙар.

Көйөргәҙе районы колхоздары трассала 40 мең кубометрҙан артыҡ ер эштәре башҡарҙылар, заданиеләрҙең инде 50 проценте үтәлде.

Яңы демократия илдәре

Болгария халыҡ республикаһының демократик үҫешендәге уңыштар

Болгарияла илде яңыса ҡайтанан төҙөү хәрәкәте көндән-көн киңәйә, халыҡтың политик активлеге һәм хеҙмәт энтузиазмы үҫә бара. Был күтәрелеш — илдә ныҡлы рәүештә үткәрелгән экономик һәм политик ҡайтанан ҡороуҙар һөҙөмтәһе булып тора; шуның арҡаһында Болгария социалистик үҫеш юлына ныҡлы рәүештә баҫты.

Үткән йылдың аҙағында Болгарияның Халыҡ собраниеһе промышленносте национализациялау тураһында закон ҡабул иткәйне; был закон буйынса 6 меңдән артыҡ предприятие, кустарный промышленностән башҡа, әсылда, бөтә промышленность государство ҡулына күсте. Эксплоатацияны бөтөрөү, хеҙмәт емештәренең бөтә халыҡ файҙаһына булыуын илау илдә быға тиклем бер ваҡытта ла күрелмәгән дәрәжәлә хеҙмәт күтәрелеше тыуҙырҙы. Национализация үткәрелгәндән һуң, промышленносте эрәләтеү, йәғни рентабелле булмаған ваҡ предприятиеләрҙе бергә ҡушыу эше үткәрелде. Ил өсөн артыҡ әһәмиәте булмаған ҡайһы бер производство тармаҡтары ҡыҫҡартылды. Хужалыҡтың хәл иткес тармаҡтарын үҫтереүгә иң күп иғтибар бирелә. Яңы промышленность төҙөлешә Болгария тарихында быға тиклем бер ваҡытта ла күрелмәгән темп менән алып барыла. Бары тик быйыл ғына Болгарияла 265 предприятие төҙөлөү өҫтөндә һәм төҙөлә башлаясаҡ. Яңы фабрикалар ғына түгел, хатта ҙур-ҙур промышленность үҙәктәре ҡорола. Болгар [illegible]ренең көсө менән Хасково [illegible]һынан 17 километр алыҫлыҡта Марица йылғаһы ярына [illegible] башлаған Димитровград [illegible]лаһы ла шулар иҫәбенә инә. Унда иң ҙур цемент заводы, химик ашламалар етештерә торған ҙур комбинат, ике ҙур электр станцияһы һәм башҡалар үҫеп сығасаҡтар.

Промышленность предприятиеләре менән бер рәттән торлаҡ йорттары, мәктәптәр, клубтар, парктар һәм башҡалар һалына.

Димитровград—ул берҙән-бер халыҡ төҙөлешә түгел. Болгар хеҙмәтсәндәренең, бигерәк тә болгар йәштәренең үҙ теләктәре менән эшләүҙәре нигеҙендә Перник—София тимер юлы, иң ҡыҫҡа юл менән Төньяҡ Болгарияны уның көньяғы менән тоташтырыусы, Хәин—Боаз перевалы аша һалынған таш юл, башҡа күп кенә таш юлдар, һыу каналдары һәм башҡалар һалынды.

София хеҙмәтсәндәре апрель аҙаҡтарында илдең төҙөлөш объекттарына 250 мең доброволец төҙөүсенән торған дөйөм болгар бригадаһынан беренсе смена йәштәрҙе оҙаттылар. Болгария премьер-министренең урынбаҫары Трайчо Костов митингыларҙың беренһендә сығыш яһап, былай тине: «Оҙаҡламай беҙҙең илебеҙҙә төҙөлөш эштәре алып барылмаған бер генә мөйөш тә ҡалмаясаҡ».

Промышленноскә национализация үткәреү һәм хеҙмәт күтәрелеше арҡаһында халыҡ хужалығының ике йыллыҡ планы уңышлы рәүештә тормошҡа ашырыла. Ошо йылдың беренсе кварталында Болгарияның промышленносе продукцияны, үткән йылдың шул уҡ ваҡытына ҡарағанда, 43 процентҡа артыҡ эшләп сығарҙы. Варна текстильщиктәре ошо йылдың тулы булмаған дүрт айы эсендә, үткән йылғыға ҡарағанда, 2 миллион метрға артыҡ туҡыма етештерҙеләр. «Поповдол» шахтаһы горняктәренең күп бригадалары күмер сығарыуҙың йыллыҡ программаһын үтәнеләр ҙә инде һәм хәҙер улар 1949 йыл иҫәбенә эшләйҙәр. Иң яҡшы хеҙмәт кешеләренең исемдәре бөтә илгә билдәле. Болгар эшселәренән, инженерҙәренән һәм техниктәренән 665 кеше алтын һәм көмөш «Хеҙмәт ордене» менән наградланды.

Болгарияның ауылдарында ла яҡшы уҡ алға китеш бар. «Ер уны эшләгән кешегә»— тигән принципта үткәрелгән аграр реформа помещиктәр синыфын бөтөрҙө һәм 125 мең гектар ерҙе крәҫтиәндәргә бирҙе. Халыҡ хужалығының ике йыллыҡ планы ерһеҙ һәм аҙ ерле крәҫтиәндәрҙән тағы ла 150 мең кешене ер менән тәьмин итеүҙе күҙҙә тота. Былар бөтәһе лә крәҫтиәндәрҙең хәлен байтаҡ яҡшыртты һәм ауыл хужалығының кимәлен күтәрҙе. Элек, реакцион режим заманында тракторҙар һәм ауыл хужалығы машиналары бары тик айырым помещиктәрҙә генә булһа, һәм крәҫтиәндәрҙә иң артта ҡалған ағас һабан хакимлек итһә, 1947 йылда уҡ инде Болгарияла 30 машина-трактор станцияһы бар ине. Ә быйыл Болгария баҫыуҙарында 50 МТС-тың 1300 тракторы һәм башҡа күп ауыл хужалығы машиналары эшләй.

Ауыл хужалығын кооперациялаштырыу өлкәһендә лә яҡшы уҡ уңыштар бар. Ватан фронты власте үҙ ҡулына алырҙан бик күп алда уҡ әле болгар крәҫтиәндәре ярлылыҡтан сығыу юлын хеҙмәт кооператив игенселеге хужалығынан эҙләй ине. Был хужалыҡтар бары тик хәҙер, халыҡ-демократия режиме ваҡытында ғына киң рәүештә үҫә алдылар. Крәҫтиәндәр ҙур дәрт менән хеҙмәт кооператив игенселеге хужалыҡтары ойоштора башланылар. Болгарияла хәҙер бындай хужалыҡтар 600 ләп һанала. Улар 50 меңгә яҡын крәҫтиәнде берләштерәләр һәм 200 мең гектар самаһы ер эшкәртәләр. Бындай кооператив хужалыҡтарҙа крәҫтиәндәр ергә индивидуаль милкте һаҡлайҙар һәм доходтарҙың бер өлөшөн ер рентаһы формаһында үҙҙәренә алалар. Ләкин бына ошо башланғыс формала ла кооператив хужалыҡтар Болгарияла яҡшы һөҙөмтәләр бирәләр.

Үткән йылда Болгарияның барлыҡ кооператив хужалыҡтары, индивидуаль хужалыҡтарға ҡарағанда, уртаса ике тапҡырға юғары урожай алдылар.

Болгария халыҡ республикаһының культура өлкәһендәге уңыштары ла бик күренекле. Унда ысынысындан культура революцияһы булды. Демократик режим еңгәнгә тиклем халыҡтың 30 проценте уҡый-яҙа белмәй ине. Хеҙмәтсән халыҡ, бигерәк тә, урта һәм юғары мәғлүмәт ала алмай ине. Культура өлкәһендәге һәр төрлө прогрессив башланғыстар аяуһыҙ рәүештә баҫтырыла ине.

Хәҙер хәл тамырынан уҡ үҙгәрҙе. Болгарияның ҡалаларында һәм ауылдарында 170 урында яңы башланғыс мәктәп һалынды. Урта уҡыу йорттарының һаны икеләтә артты. Софияла булған университеттән тыш, Пловдивда, Руста һәм Варнала өс яңы университет асылды. Студенттар һаны өс тапҡыр артты. Дөйөм эшселәр профсоюзы инициативаһы менән Софияла эшселәр университете асылды, унда 450 эшсе һәм хеҙмәткәр уҡый.

Профессиональ уҡытыу киң йәйелдерелде. Ҡалаларҙа һәм ауылдарҙа 4 мең урында халыҡ өсөн уҡыу өйө асылды. Сығарыла торған китаптарҙың тиражы дүрт тапҡырға үҫте. Бик күп яңы театрҙар, унарлаған кино-театрҙар, клубтар, библиотекалар һәм башҡалар асылды.

Болгар халҡы илдең бөтә политик көстәрен бергә туплауға өлгәште; улар берҙәм общественно-политик ойошмаға — Ватан фронтына берләштеләр. Болгарияны социаль-экономик яҡтан һәм культура ағымын уңышлы рәүештә үҫтереү өсөн быны әһәмиәте бик ҙур булды. Бындай ойошма Болгария Ватан фронтының 1948 йыл февралендә булған II конгресендә төҙөлдө; конгресс Ватан фронтын яңы башланғыстарҙа ҡайтанан ойоштороҙо.

Берҙәм общественно-политик ойошма булдырыу айырым партияларҙы бөтөрөү тигән һүҙ түгел. Шуның менән бергә, Ватан фронтының уставы, был ойошмаға ингән һәр бер партияның дөйөм программаға ярашлы рәүештә эш итергә һәм фронт ҡарарҙарына буйһонорға бурыслы булыуын күҙҙә тота. Ватан фронтына ингән ҡайһы бер партияларҙағы уң элементтәрҙе тар-мар итеү арҡаһында Ватан фронтын ҡайтанан ойоштороу һәм уны нығытыу мөмкинлеге тыуҙы. Реакцион «оппозицион» партияларҙы — тышҡы һәм эске реакция агентураһын фаш итеү һәм уларҙы бөтөрөү Болгарияның политик тормошонда ҙур ваҡиға булды.

Болгарияның эшселәр (коммунистар) партияһы яңы Болгария төҙөүселәрҙең беренсе сафтарында торалар. Эшселәр партияһы фашистик режимға ҡаршы көрәш башында торҙо. Хәҙер инде ул илдәге бөтә социаль-экономик ҡайтанан ҡороуҙарҙың ойоштороусыһы һәм инициаторы булып сығыш яһай. Болгариялағы социал-демократтар партияһының эшселәр (коммунистәр) партияһы менән берләшеү тураһындағы ҡарары болгар эшселәр синыфының тулы берҙәмлеген урынлаштырыуға килтерер һәм киләсәктә Болгария демократияһының тағы ла ҙурыраҡ уңыштарға өлгәшеүен тәьмин итер.

Болгария халыҡ республикаһының тышҡы политика өлкәһендәге гүзәл уңыштарын билдәләмәй үтеү мөмкин түгел. Монархист-фашистик режим ваҡытында үҙенең бөтә күршеләре менән дошман булған Болгария хәҙер халыҡ демократияһы илдәре менән договорҙар аша нығытылған яҡын дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрендә йәшәй, һәм, башҡа ысын демократик илдәр менән, Көньяҡ-көнсығыш Европала тыныслыҡ һәм именселек тәрәге булып хеҙмәт итә.

Ошо йылдың апрель аҙағы Болгария өсөн уның тышҡы политикаһында яңы уңыш менән билдәләнде. Прагала Чехословакия республикаһы менән Болгария халыҡ республикаһы араһында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында договорға ҡул ҡуйылды, ә әле күптән түгел Польша менән дә шундай уҡ договор төҙөлдө.

Ә Советтәр Союзы менән дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен нығытыу, болгар халҡына уның бөйөк күршеһе тарафынан күрһәтелә торған өҙлөкһеҙ ярҙам һәм булышлыҡ Болгария һәм уның халҡы тормошонда бигерәк тә ҙур урын тота.

Советтәр Союзы арҡаһында болгар халҡы гитлерсе илбаҫарҙарҙан азат ителде. СССР Болгария халыҡ республикаһына экономик һәм мораль яҡтан киң ярҙам күрһәтеп килде һәм күрһәтә. СССР демократик Болгарияға уның бойондороҡһоҙлоғон ситт ил империалистәренең һәр төрлө һөжүмдәренән һаҡлап алып ҡалырға ярҙам итте.

Ошо йылдың 18 мартында дуҫлыҡ, хеҙмәттәшлек һәм үҙ-ара ярҙам тураһында төҙөлгән Совет-Болгар договоры Болгария халыҡ республикаһының көсөн һәм бойондороҡһоҙлоғон тағы ла нығыта, уның артабан сәскә атыуына булышлыҡ итә. Был договорҙың бөтә халыҡ тарафынан бик ҙур ҡәнәғәтләнеү менән ҡаршыланыуы ғәжәп түгел.

Болгар халҡының социализмға барыу юлында осраясаҡ ауырлыҡтары күп әле. Ул, атап алғанда, сит ил реакцияһының һәм уның ил эсендәге агентураһының ҡоторонҡо ҡаршылығына осрай; улар Болгарияның демократик юл менән үҫеүен өҙергә тырышалар. Ләкин болгар халҡы үҙ сафтарын тығыҙ рәүештә туплап, ышаныс менән алға бара.

А. Шатилов.

Халыҡ-ара күҙәтеү

Франциялағы ваҡиғалар

Францияла политик хәл һуңғы аҙна эсендә һиҙелерлек рәүештә киҫкенләште. Был, Германия мәсьәләһе буйынса алты илдең Лондонда булған конференцияһының ҡарарҙары менән бәйләнгән. Был конференцияла Франция өсөн иң мөһим мәсьәләләр буйынса Франция [illegible] экономик бойондороҡлоғона [illegible] ҡарарҙар ҡабул ителде.

Француз дипломатияһы репарациялар, Рур өҫтөнән халыҡ-ара контроль яһау һәм башҡалар буйынса [illegible] бер генә талапты ла үҙ файҙаһына хәл итә алмайынса, Милли собраниела Бидо әйткәнсә, «килешеү» политикаһын алып барып, англо-сакстар алдында капитуляцияға китте. Германияның хәрби [illegible] Германия конференцияһында Франция һис бер төрлө гарантия ала алманы. Ялта һәм Потсдам конференцияларының ҡарарҙарына ярашлы рәүештә Германияны демилитаризациялау һәм демократиялаштырыу [illegible] Дүрт державаның хеҙмәттәшлек итеүе политикаһынан баш тартып һәм Германия мәсьәләһен Англия менән АҠШ тарафынан [illegible] Франция дипломатияһы [illegible] англо-саксон державаларының бойондороҡлоғона булып сыҡты.

Германия мәсьәләһе буйынса Лондон «тәкдимдәре» Гувер менән Даллестең билдәле рецептары буйынса Көнбайыш Германия государствоһын төҙөүҙе күҙҙә тота. Улар Рур өҫтөнән контроль яһауҙы (продукция бүлеү өҫтөнән контроль) шундай системаһын күҙҙә тоталар, был системаны тормошҡа ашырғанда Франция, оккупировать итеүсе державаларҙың береһе булыуына ҡарамаҫтан, шелтә державаға әйләнә.

Рур Америка монополияларының вотчинаһына әйләнәсәк, Уолл-стрит хужалары Көнбайыш Европа державаларының [illegible] конкурентлыҡтарына түҙеп торорға теләмәйҙәр. АҠШ, [illegible] Британия оккупацион зонаһына ингән Рур өҫтөнән монополиялы контроль яһауҙан Великобританияның баш тартыуын өҫтөн, уға финанс ярҙам биреп, [illegible] Бизония төҙелгәндән һуң, Көнбайыш Германияла оккупация властарҙың политикаһына Америка хәрби губернаторы генерал Клей [illegible] ...

Көнбайыш Германия промышленностенда үҙенә команда позицияларын таныу итеп, Англия менән Америка [illegible] Маршалл планы [illegible] Лондон конференцияһының үҙенең политик хакимлеген тулыһынса файҙаланды.

Лондон «тәкдимдәре» башта уҡ Францияла ҡеүәтле тревога тыуҙырҙы. Милли собраниела Лондон конференцияһы [illegible] ҡарарҙарына ҡаршы сығыш яһанылар. Депутат Пьер Кот был хәлде айырыуса билдәләне. Былай тине: Франция менән СССР араһындағы мөнәсәбәттәрҙе һыуытыуға китергән Франция хөкүмәтенең тышҡы политикаһы Францияны моралъ яҡтан изоляцияланыуға килтерҙе.

Матбуғат былай тип хәбәр итә: Лондонда француз дипломатияһы тарафынан үткәрелгән линияға француз халкы берҙәм рәүештә ҡаршы килә, шуға күрә хөкүмәт Милли собранияла фекер алышыуға барған ваҡытта, милли собранияның [illegible] ... АҠШ-тың һәм Англияның ... аҙ ғына булһа ла юл ҡуйыуына өмөтләнергә мәжбүр ителде. Ошо маҡсат менән ул эштәре Министрҙарҙың генераль секретаре Шовель Лондонға ебәрелде. Ләкин уның Бевин менән һәм Америка послы Дуглас менән һөйләшеүҙәре бер ниндәй һөҙөмтәләр бирмәне. Англо-саксон державалары Лондон килешеүен һис бер үҙгәрешһеҙ хуплауҙы талап итеп, Францияның башҡа тормошҡа ашыра башлауҙы [illegible]. Хөкүмәт коалицияһын төҙөүсе партияларҙың парламенттағы фракцияларының лидерҙары [illegible] проект социалистарҙың актив ҡатнашлығында эшләп сығарылды. Был проект өсөн 297 кеше, ҡаршы 289 кеше тауыш бирҙе. Фекер алышыуҙарҙың [illegible] «тәкдимдәрен» француз халҡы тарафынан моралъ яҡтан гәйепләнгәнлеген күрһәтте.

Лондон «тәкдимдәре» тикшерелгән Франциялағы күп кенә районы забастовка кәрәкле [illegible] Клермон-Ферранда [illegible] Франция [illegible] Ул — халыҡ-ара монополиялар [illegible] ҡоралы.

Франция компартияһы Францияның милли яҡтан [illegible] Маршалл [illegible] Лондонда [illegible] Европаны бүлгеләү политикаһынан баш тартыуҙы күҙҙә тота. Компартия [illegible] Францияның прогресс юлы менән алға алып бара алырлыҡ демократик берҙәмлек хөкүмәте төҙөү өсөн көрәшеүсе сакырыла.

Германияның берҙәмлеге өсөн халыҡ хәрәкәтенең уңыштары

23 майҙан алып 13 июнгә тиклем Германияла илдең берҙәмлеге тураһындағы мәсьәлә буйынса халыҡ референдумы үткәреүҙе талап итеү маҡсатында подписьтар йыйыу үтте. Тулы булмаған мәғлүмәттәргә ҡарағанда, был талапҡа 13,1 миллион немец ҡул ҡуйған. [illegible] өсөн кәрәкле булған минимумға ҡарағанда, был һан өс тапҡырға артып китә. Подписьтар йыйыуҙы башҡалала — Берлинда [illegible] берҙәм государствола йәшәү буйынса законлы хоҡуҡты талап итергә һәр бер немецҡа мөмкинлек бирҙе. Шуның менән бергә, подписьтар йыйыу Германияны бүлгеләүгә юнәлтелгән Лондон «тәкдимдәренә» ҡаршы немец халҡының протесен кәүҙәләндерҙе.

Репрессиялар ҙа, матбуғат тарафынан алып барылған яла яғыу кампаниялары ла был хәрәкәттең уңышлы үтеүенә ҡомасаулыҡ итә алманы. Англия администрацияһының Лондон конференцияһы [illegible] көндә — 1 июнда иғлан ителгән белдереүендә [illegible] Был белдереү, «Көнсығыш Германияла Советтар Союзының [illegible] ... тигән», — тип әйтелә.

Германияның Көнбайыш зоналарында Германияның берҙәмлеге тураһындағы мәсьәләгә тикшереү айҡанлы буржуаз партиялар араһында [illegible] ла киҫкен рәүештә дифференциация килеп тыуҙы. Социал-демократтар партияһында һатлыҡ Шумахер етәкселегенә ҡаршы сығыш яһаусы оппозиция килеп тыуҙы. Күптән түгел социал-демократтар оппозицияһы вәкилдәренең бер төркөм белдереү иғлан итте; [illegible] Германияның берҙәмлеге өсөн һәм Маршалл [illegible] ҡатнашыуын талап итәләр.

Көнбайыш Германиялағы оккупацион властарҙың Лондонда сығарылған ҡарарҙарҙы популярландырырға маташыуҙары уңышҡа килтерә алмай. Немец халҡы ике [illegible] Германияның йәшәүенә юл ҡуйырға теләмәй. Халыҡ референдумы үткәреүҙе талап итеүгә подписьтар йыйыуҙың уңышлы үтеүе немец халҡының Көнбайыш Германияның [illegible] халыҡ-ара монополияларҙың вотчинаһына һәм донъя реакцияһының ҡоралына әйләндерелеүен теләмәгәнлеген күрһәтә.

К. Гофман.

Швецияға Англия-Америка ҡыҫымы

НЬЮ-ЙОРК, 16 июнь. (ТАСС). Ассошиэйтед пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Лондондан хәбәр итеүенә ҡарағанда, Швеция кругтары АҠШ һәм Англия Швецияны Көнбайыш Европа союздары менән бәйләнештә булған Скандинавия илдәренең оборона союзына ҡушылырға өндәй, тип белдерәләр. Ләкин Швеция хөкүмәте хәҙерге ваҡытта ундай союзға инергә теләмәй. Хәбәрҙәр кругтарҙың белдереүҙәренә ярашлы рәүештә, Англия сит ил эштәре министрствоһында уҙған аҙнала Англиялағы Швеция посолы Богеманға Англия Скандинавия союзын төҙөргә теләр ине, тип белдергәндәр. Шулай уҡ хәбәрҙәр кругтарҙа ла Стокгольмдәге һәм Вашингтондағы Америка дипломаттары Ҡушма Штаттарҙың «уларҙың дуҫтары кем» икәнен белергә теләгәнлектәрен Швецияға асыҡ белдерҙеләр, тип хәбәр иттеләр.

Венгрия парламентенда государствоныҡы булмаған мәктәптәрҙе государство ҡарамағына биреү тураһында закон ҡабул итеү

БУДАПЕШТ, 17 июнь. (ТАСС). Кисә бер көнлөк фекер алышыуҙарҙан һуң Венгрия парламенте, күпселек тауыш менән, государствоныҡы булмаған бөтә мәктәптәрҙе государство ҡарамағына биреү тураһында закон ҡабул итте.

Закон проектын ҡабул итеүҙә ултырышта ҡатнашҡан 293 кешенән 230 депутат тауыш бирҙе.

Закон проектына ҡаршы тик халыҡ демократик партияһы (Баранкович партияһы) Шлахта группаһы депутаттары ғына һәм Белог партияһының бер нисә депутаты ғына ҡаршы тауыш бирҙе.

БУДАПЕШТ, 17 июнь. (ТАСС). Кисә кис республиканың президенте Тельди Золтан парламент тарафынан государствоныҡы булмаған мәктәптәрҙе государство ҡарамағына биреү тураһында ҡабул ителгән законға ҡул ҡуйҙы.

Лондон порты эшселәренең забастовкаһы

ЛОНДОН, 17 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Лондонда 15 мең докер (порт эшсеһе) баш күтәргән. Темзала 90 корапҡа йөк тейәү һәм бушатыу эштәре туҡтатылған. Был корапарҙың күбеһе Лондон портынан Англияның сит илгә сығара торған тауарҙарын тейәп, китергә тейеш булған, ә икенселәре Англияға аҙыҡ-түлек килтереүсе корапар булғандар.

Профсоюз порт эшселәрен эшкә ҡушырға мәжбүр итергә тырыша. Ләкин забастовканы 38 цех старостаһы яҡлай. Улар арбитраж органы баш күтәреү килеп сығыуға сәбәп булған конфликтты (бысраҡ йөктәрҙе ташыған өсөн өҫтәмә хаҡ һораусыларҙы эштән сығарыу) тикшергәнгә тиклем забастовканы дауам иттерергә тәҡдим итәләр.

Прагала Чехословакия-Совет сауҙа палатаһы төҙөү

ПРАГА, 17 июнь. (ТАСС). Кисә Прагала Чехословакия-Совет сауҙа палатаһының нәүбәттәге йыйылышы булды. Премьер-министр урынбаҫары Фирлингер, тышҡы сауҙа министры Грегор һәм СССР-ҙың Чехословакиялағы сауҙа вәкиле Бакулин йыйылышта телмәр менән сығыш яһанылар. Сығыш һөйләүселәр ике ил араһында сауҙа, финанс һәм промышленность бәйләнештәрен арттырыуҙа Чехословакия-Совет сауҙа палатаһының ҙур әһәмиәткә эйә булғанлығын билдәләп үттеләр. Учредительный собрание Прагала Чехословакия-Совет сауҙа палатаһы төҙөргә ҡарар итте. Был палата составына 40 кеше һайланды. Палатаның председателе итеп Чехословакия промышленное үҙәк союзының генеральный секретаре доктор Фукатко һайланды.

Англияла машина төҙөүселәрҙең забастовкаһы

ЛОНДОН, 17 июнь. (ТАСС). «Дейли Уоркер» хәбәрсеһенең белдереүенә ҡарағанда, «Платт Бразерс» фирмаһының туҡыу машиналары төҙөү Хартфорд һәм Олдхем заводтарында хәҙерге ваҡытта 5 мendән артыҡ эшсе забастовкала ҡатнаша. Кисә Олдхемдең ҡалған заводтарында ла эш ташлауҙар башланды.

Забастовка 14 июнда цех старостаһы Гарри Колкиттең эштән сығарылыуы айҡанлы башланды. Хартфорд заводтары правлениеһе бынан бер аҙна элек уның эштән сығарыласағы тураһында белдереп ҡуйған. Туҡыу машиналары төҙөү заводтарының башҡаларынан булышлыҡ алыу өсөн саралар күрелә. Был предприятиеларҙа барлығы 18 мең кеше эшләй.

Клермон-Феррандағы ваҡиғаларға ҡарата

ПАРИЖ, 17 июнь. (ТАСС). Франс пресс агентствоһының Клермон-Феррандан хәбәр итеүенә ҡарағанда, 16 июнда Клермон-Ферран аша үтә торған линияларҙа тимер юл хәрәкәттәре туҡтатылған. Был хәл ошо узелда эшләгән тимер юлсыларҙың забастовкаһына солидарлыҡ күрһәтеү забастовкалары һөҙөмтәләрендә килеп тыуған.

Чехословакияның коммунистар һәм социал-демократик партияларын берләштереү алдынан

ПРАГА, 18 июнь. (ТАСС). Кисә Чехословакия коммунистар партияһының генеральный секретаре Сланский председателлегендә, Үҙәк Комитеттең социал-демократик һәм коммунистар партияһын берләштереү буйынса нәүбәттәге кәңәш ултырышы булды. Ултырышта социал-демократик партияның етәксе работниктарын коммунистар партияһының етәксе органдарына өҫтәп индереү мәсьәләһе хәл ителде. (Билдәле булғанынса, эшселәрҙең ике партияһын, коммунистар партияһы базаһында, берләштереү үткәреләә). Өҫтәп индерелгән тәүге состав, 1948 йылдың 27 июнендә, берләшкән съезда иғлан ителәсәк. Шулай уҡ ултырышта партия матбуғаты тураһында ҡарар ҡабул ителде.

АҠСА РЕФОРМАҺЫН ҮТКӘРЕҮ АЙҠАНЛЫ БИЗОНИЯЛА ПАНИКА

БЕРЛИН, 18 июнь. (ТАСС). Немец матбуғатының хәбәр итеүенә ҡарағанда, сепаратный аҡса реформаһы үткәреү айҡанлы, халыҡтар араһындағы паника ҙур күләм алды.

Гамбургтан хәбәр итеүгә ҡарағанда, ҙур предприятиеларҙа беренсе тапҡыр массовый рәүештә эштән сығарыуҙар үткәрелгән лә инде. Байтаҡ предприятиелар, төрлө сәбәптәргә һылтау яһап, эштәрен туҡтатҡандар.

Гамбургтағы аҙыҡ-түлек магазиндәренең күпселеге продуктылар һатыуҙан баш тарталар һәм йорт хозяйкалары, хатта, тоҙ ҙа ала алмайҙар. Ҡоралды полиция һәм оккупацион ғәскәрҙәр, яңы аҡсаны ташыуҙы һаҡлау маҡсатында, Гамбургтың биржаһын һәм банкыларын һаҡлайҙар. Баҙарҙарҙа әйбер хаҡтары ныҡ күтәрелде.

АДН агентствоһының хәбәр итеүенсә, пекарняларҙың һәм аҙыҡ-түлек магазиндәренең хужалары, белә тороп, продуктылар һатыуҙан баш тартыуҙары арҡаһында, Рур өлкәһендә аҙыҡ кризисе тыуыу ҡурҡынысы ныҡ үҫте. Күпләп һәм ваҡлап һатыусы сауҙагәрҙәр халыҡҡа һатыла торған тауарҙы йәшерәләр.

Өфө ҡалаһының Ленин районы Советы пионерҙар лагерендә. Һүрәттә (һулдан уңға): Ә. Сираев һәм Р. Вәлиевтәр шахмат уйнайҙар.

А. Червянский фотоһы.

Желобецкий алдынғыларҙың тәжрибәләрен өйрәнергә экскурсияға китте

Дәүләкән МТС-ының иптәш Виктор Желобецкий етәкселек иткән бригадаһы йылдан-йыл яҡшыраҡ уңыштарға өлгәшә. Үткән йыл юғары урожай үҫтергән өсөн иптәш Желобецкий Ленин ордене менән награлланды. Бригада быйыл тағы ла мулыраҡ урожай үҫтереү йөкләмәһен алды. Уны үтәү өсөн бөтә сараларҙы күрә.

Бригада яҙғы сәсеү планын 20 майға арттырып үтәне. Пар һөрөүҙә 1 июнгә тулыһынса тамамланды. Бында шартлы һәр бер тракторға 304-әр гектар ер эшкәртелде. Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Алехин менән ярышта иптәш Желобецкий бригадаһы беренселекте алды һәм үҙ ҡулында МТС-тың күсмә Ҡыҙыл Байрағын һаҡлай.

Хәҙер урожай йыйнауға ла әҙерлек тамамланды. «Коммунар» комбайны бөгөндән баҫыуға сығырға әҙер. Был машина менән иптәш Желобецкий йыл һайын 500—600 гектар [illegible] йыйнай. Быйыл [illegible] ғарыуҙы тағы ла күтәреү өсөн [illegible] бирә. Бөтә агрегат кешеләр [illegible] комплектовать ителгән, [illegible] лар бүленгән, уларҙы кейәүҙән [illegible] ренән таҙартыу өсөн уҫтау [illegible] алып барыла.

Атаҡлы бригадир иптәш Желобецкий өлгәшелгәндәр менән [illegible] тынысланмай. Ул алдынғылар тәжрибәләрен ныҡлы өйрәнеп, уларҙы практикала киң ҡулланыу [illegible] Ошо маҡсат менән Виктор Желобецкий Советтар Союзының алдынғы МТС-тарына экскурсияға китте. Ул Сталино өлкәһе Старо-Бешевский МТС-ында булды. Бында СССР Верховный Советы депутаты, Сталин премияһы лауреаты иптәш П. Ангелина етәкселек иткән трактор бригадаһы тәжрибәләре менән ныҡлап [illegible] шасаҡ. И. Желобецкий Мәскәү механизация институтында да [illegible] ласаҡ.

Шефтарҙың ярҙамы

«Снабчерметтең» Башҡортостан контораһы коллективы үҙе шефлыҡ иткән «КИМ» колхозына (Ҡырмыҫҡалы районы) ҙур ярҙам күрһәтеп килә. Контора работниктәре колхозға сушилка төҙөү өсөн 75 килограмм ҡаҙаҡ, тимерлеккә яғыу өсөн бер тонна таш [illegible] хужалыҡ кәрәктәренә 80 [illegible] тәгәрмәс, 40 туғым, 250 килограмм сортлы тимер, 400 килограмм [illegible] рәсин һәм башҡа [illegible] ярҙам иттеләр.

Л. Әминев[illegible]

Колхоздар өсөн электр станциялары

Черниковск нефть эшкәртеү заводының колхоздарҙы һәм МТС-тарҙы электрлаштереү тураһындағы мөрәжәғәтенә яуап итеп, ҡаланың күп кенә промышленность предприятиелары колхоздарҙа электр станциялары төҙөү буйынса үҙҙәренә йөкләмә алдылар.

Октябрь революцияһының 31 йыллығына Зианчура районының «Большевик», «Красная заря» колхоздарында Ильич лампалары янасаҡ. Уларҙы Черниковск машиналар төҙөү заводы тарафынан төҙөлгән Кулаватский һәм Надеждинская ТЭС-тәре хеҙмәтләндерәсәк. Ошо көндәрҙә завод электр станциялары өсөн кәрәкле булған оборудованиеларҙы әҙерләй башланы. Июль айында төҙөлөш өсөн был колхоздарға дүрт специалист [illegible] һәм электр станцияһын монтажлау, һауа линияларын йөрөтөү [illegible] электротехник ебәреләсәк.

21-се номерлы трест колхоздар өсөн бер нисә гидроэлектростанция төҙөүҙе күҙҙә тота. Ул [illegible] се нәүбәттә Көйөргәҙе йылғаһында төҙөлә башлаған 45 [illegible] кеүәтле Мораптал ТЭС-ен [illegible] ебәрәсәк. Был станция 7 [illegible] эксплоатацияға тапшырыласаҡ. Трест шулай уҡ Зианчура районында 180 киловатт кеүәтле [illegible] гол, Күгәрсен районында [illegible] ГЭС-тәре төҙөүҙе планлаштыра. Хәҙерге көндә уларҙы [illegible] һәм башҡа әҙерлек эштәре [illegible] рыла.

Ҡандрала яңы төҙөлештәр

«Башнефтеразведка» тресының төҙөлөш-монтаж конторы Ҡандрала нефть разведкаһында эшләүсе эшселәр өсөн быйыл һигеҙәр квартиралы ике ҡатлы биш йорт һәм яңы типта ун торлаҡ йорто төҙөүҙе планлаштырғайны. Торлаҡтар төҙөү май аҙағында башланып, өс йорт һалынып инде. Ошо ике ай—июнь, [illegible] айҙарында һигеҙ йорт төҙөлөп [illegible] тейеш булһа, төҙөүселәр ун [illegible] төҙөргә йөкләмә алдылар.

С. Зайруллин[illegible]

Колхозда яңы тирмән

Ғафури районында «Париж коммунаһы» колхозы ағымдағы йылда яңы тирмән эшләтте. Яңы тирмән Һабай гидроэлектр станцияһынан ток алып, электр көсө менән эшләй. Ул тәүлеккә өс тоннаға яҡын он тарта.

Силос һалалар

ҮРГЕ ҠЫЙҒЫ. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Общественный малсылыҡҡа ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн Ҡыйғы районының Фрунзе исемендәге колхозында бөтә хәстәрлектәр күрелә. Малсылыҡ работниктәре һәм колхозсылар хәҙер силос һалыу эшен ойоштороҙолар. 5 көн эсендә 100 тонна силос һалынды.

«Крестьянин», Буденный һәм Сталин исемендәге колхоздарҙа ла силос әҙерләү эше ойошҡанлыҡ менән бара. Был колхоздар силос һалыуҙы бесәнгә төшөүгә тиклем тамамларға тырышалар.

Беренсе төркөм комбайнерҙар мәктәпте тамамланылар

Учалы районы Вознесенка [illegible] заторҙар әҙерләү мәктәбе [illegible] дәрҙә беренсе төркөм комбайнерҙар әҙерләп сығарҙы. 24 кеше [illegible] нау үтте. Һынауға [illegible] ҙан 5 кеше отлично, 12 кеше [illegible] шы һәм ҡалғандары ҡәнәғәтләнерлек билдәһенә һынау тапшырҙылар.

Китап магазины

Октябрьск ҡалаһында Ком[illegible] Октябрьск бүлеге өсөн яңы [illegible] магазин һалынып бөттө. Ул [illegible] ҙән эксплоатацияға тапшырыласаҡ.

Магазин эргәһендә махсус [illegible] һалынды. Унда склад, магазин работниктәре өсөн квартира [illegible] һәм башҡа ярҙамсы бүлмәләр [illegible]

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ[illegible]

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-7[illegible], промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-72-26.

П 00790. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы [illegible]

БӨТӘ ИЛДӘРҘЕН ПРОЛЕТАРИЙҘАРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 123
22
июнь
шишәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ

«Правда» газетаһының баш редакторы иптәш П. Н. Поспеловты Ленин ордене менән наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумы Указы. (1-се бит).

Чехословакияның посолы Б. Лаштовичка әфәндене В. М. Молотовтың ҡабул итеүе. (1-се бит).

Малдар өсөн аҙыкты мул әҙерләргә! (1-се бит).

В. Воробьев. — Бөйөк Ватан һуғышының башланыуына өсө йыл тулыуға ҡарата. (2-се бит).

А. Кальметьев. — Ауыл хужалығы машиналарына һәм тракторҙарға запас частарҙе күберәк етештерергә. (2-се бит).

Ишембай—Ермолаевка тимер юл төҙелешендә. (2-се бит).

ЙЫЛЛЫҠ ПЛАН—7 НОЯБРГӘ! (3-сө бит).

СПЕЦИАЛИСТ КӘҢӘШТӘРЕ. В. Гирфанов. — Көнбағыш сәсеүлектәрен яҡшы тәрбиәләргә. (3-сө бит).

Колхоз председателе. (3-сө бит).

Тимер Алюк. — Һабан туйы. (4-се бит).

Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Йәш коммунистәрҙе политик тәрбиәләү партия ойошмаһының көндәлек эше

Большевиктәр партияһы үҙенең члендәрен һәм кандидаттарын политик тәрбиәләүгә һәр ваҡыт иң серьез иғтибар биреп килә һәм партия комитеттәренән коммунистәрҙең идея-политик кимәлдәрен күтәреү буйынса даими эш алып барыуҙы талап итә. Бөйөк юлбашсыларыбыҙ Ленин һәм Сталин беҙҙе, большевиктәр партияһы үҙ сафтарының сифаты менән, уларҙың идея һәм ойошторо яғынан тығыҙ тупланған булыуҙары менән көслө, тип өйрәтәләр.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында һәм унан һуңғы осорҙа партия сафтары һан яғынан бик ныҡ үҫте, шул арҡала уның составы үҙгәрҙе. 80 меңгә яҡын ВКП(б) членен һәм кандидатын берләштергән Башҡортостан партия ойошмаһының составында, һуғыш ваҡытында һәм унан һуң партияға ингән коммунистәрҙең һаны 75 процент тәшкил итә. Шунлыҡтан, хәҙер, коммунистәрҙең идея-политик кимәлдәрен күтәреү, бигерәк тә йәш коммунистәрҙе политик уҡытыу һәм практик эштә большевистик сыныҡтырыу бурысы айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә булып тора.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең идеологик мәсьәләләр буйынса ҡабул иткән ҡарарҙарын тормошҡа ашырып, быйыл, беҙҙең күп кенә район һәм түбәнге партия ойошмаларыбыҙ партия мәғарифе, коммунистәрҙе политик тәрбиәләү эшен байтаҡ яҡшырттылар. Партия, совет һәм хужалыҡ активен политик уҡытыуҙың мөһим бер төрө булған район партия мәктәптәре Ҡырмыҫҡалы, Дыуан, Стәрлебаш, Мәсетле, Маҡар районларында үҙҙәренең эштәрен уңышлы тамамланылар. ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы райкомы эргәһендәге район партия мәктәбендә уҡыған 34 кешенең 17-һе һынауҙар ваҡытында «отличное» һәм «яҡшы» билдәһе алыуға өлгәште. Бындай фактыларҙы күп килтерергә мөмкин.

ВКП(б) Өлкә Комитетенең икенсе пленумы, әле беҙҙә партияның күп кенә район комитеттәре һәм түбәнге ойошмалары партия мәғарифе селтәренең эшен яҡшыртыуға, йәш коммунистәрҙе политик тәрбиәләү эшен көсәйтеүгә тейешле иғтибар биреп еткермәйҙәр, тип билдәләне. ВКП(б) тарихен өйрәнеү түңәрәктәрендә, политик мәктәптәрҙә һәм район партия мәктәптәрендә занятиеләрҙең идея-политик кимәле түбән. Пропагандистәргә партия ойошмаларының ярҙамы етерлек түгел. Күп кенә урындарҙа партия райкомдары, уларҙың пропаганда бүлектәре, шулай уҡ түбәнге партия ойошмаларының етәкселәре партия мәғарифе селтәренең эшенә даими контроллек итеү кәрәклеген онотәлар. Шуға күрә лә политик мәктәптәрҙең, ВКП(б) тарихен өйрәнеү түңәрәктәренең һәм район партия мәктәптәренең программаны үтәүе бер нисә йылдарға һуҙыла, тыңлаусылар составы алмашына, үтелгән темаларҙы үҙләштереү кимәле түбәнәйә. Бына Благовещен районындағы 8 политик мәктәптең береһе генә лә быйыл программаны тамамлай алманы. Хәйбулла, Воскресен, Олө-Тиләк һәм Архангельск районларында ла политик мәктәптәр һәм район партия мәктәптәре программаны үтәү эшен һаман да һуҙып килəләр.

Коммунистәрҙе политик тәрбиәләү, уларҙы хужалыҡ һәм культура төҙелешенең бөтә тармаҡтарында ла массаның вожактары итеп әүерелдереү ВКП(б) райкомдарының һәм түбәнге партия ойошмалары етәкселәренең иң мөһим бурысы булып тороуын партияның XXI өлкә конференцияһы айырыуса ныҡ билдәләп үтте. Сөнки коммунистәрҙең бер өлөшөнөң политик әҙерлеге булмауы уларҙың политик активлеген сикләй, уларға общественный политик тормошта авангардлыҡ ролен үтәүгә ҡомасаулыҡ яһай.

Туғыҙ ил коммунистик партиялары вәкилдәренең информацион кәңәшмәһендә яһаған докладында иптәш Маленков: «Партия сафтарының һан яғынан үҫеүе менән ВКП(б) члендәренең һәм кандидаттарының политик белем кимәле араһында билдәле бер тура килмәүселек барлыҡҡа килде. Шул сәбәпле партия хәҙер үҙ сафтарының тағы ла үҫеүен ашыҡтырмайынса, партия члендәренең һәм кандидаттарының политик белемен киңәйтеү бурысын ҡуя һәм коммунистәрҙең политик кимәлен күтәреүгә баҫым яһай. Сөнки һуңғы иҫәптә сифат һандан мөһимерәк», тине.

Тимәк илебеҙҙең социализмдан коммунизмға күсеүе осоронда, хәҙер бөтә юлдар коммунизмға алып барған осорҙа, бөйөк төҙелештең бөтә участкаларында партия етәкселеген тәьмин итеү өсөн, массалар араһында идеологик эште киң йәйелдереү өсөн бөтәһенән элек партияның үҙ члендәрен һәм кандидаттарын политик тәрбиәләүгә иғтибар айырыуса ныҡ көсәйтелергә тейеш. Марксистик-ленинсе революцион теорияға эйә булған, партияның практик эшендә большевистик сыныҡҡан коммунистең генә идеология фронтында, совет кешеләренең аңындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөрөү, массаны социалистик аңлылыҡ һәм совет патриотизмы рухында тәрбиәләү бурысын уңышлы үтәп барыуы мөмкин.

ВКП(б) райкомдарының һәм түбәнге партия ойошмалары етәкселәренең бурысы хәҙер коммунистәрҙе политик мәктәптәргә, ВКП(б) тарихен өйрәнеү түңәрәктәренә, район партия мәктәптәренә йәлеп итеү, үҙ алдарына уҡыуҙарын ойоштороу, партия мәғарифе эшенә даими контроль булдырыу юлы менән һәр бер коммунистең идея-политик кимәлен күтәреү эшен көсәйтеүҙән тора. Марксизм-ленинизм теорияһын өйрәнеүҙә коммунистәргә квалификациялы лекциялар, семинар занятиелəре, консультациялар үткәреү, уларҙы халыҡ-ара хәл, илдең эске тормошондағы яңылыҡтар һәм партияның мөһим ҡарарҙары менән систематик рәүештә таныштырып барыу эшенә ныҡ иғтибар бирелергә тейеш.

Һәр бер коммунисте общественный-политик тормошҡа актив ҡатнаштырыуҙа, коммунистең һәләтлегенә һәм әҙерлек кимәленә ҡарап, партия поручениеһе биреү һәм уның үтәлешен тикшереү мәсьәләһенә партия ойошмаларының етәкселәре серьез иғтибар бирергә бурыслылар. Сталинсе яңы биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн барған бөтә халыҡ көрәше һәр бер коммунистан бик ҙур ойоштороу һәм массовый-политик эш талап итә. Үҙ политик белем кимәлен күтәреү өҫтөндә даими эшләгән ваҡытта ғына һәр бер коммунистең был бөйөк һәм маҡтаулы бурысын уңышлы үтәүгә өлгәшеүе мөмкин.

„Правда" газетаһының баш редакторы иптәш П. Н. Поспеловты Ленин ордене менән наградлау тураһында

СССР Верховный Советы Президиумы УКАЗЫ

«Правда» газетаһының баш редакторы П. Н. Поспеловтың тыуыуына илле йыл тулыу айҡанлы һәм уның коммунистар партияһына һәм совет халҡына күрһәткән хеҙмәттәре өсөн иптәш Петр Николаевич Поспеловты Ленин ордене менән наградларға.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе Н. ШВЕРНИК.

СССР Верховный Советы Президиумы Секретаре А. ГОРКИН.

Мәскәү, Кремль
19 июнь 1948 йыл.

Чехословакия посолы Б. Лаштовичка әфәндене В. М. Молотовтың ҡабул итеүе

19 июньдә, Чехословакияның Ғәҙәттән тыш һәм Тулы Хоҡуҡлы Посланнигы Б. Лаштовичка әфәндене, СССР Верховный Советы Президиумы Председателенә уның ышаныс грамоталарын тапшырыуы айҡанлы, СССР Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов ҡабул итте.

(ТАСС).

Колхоз баҫыуҙарында связдең күсмә агентстволары

СССР связь Министрстволығы Краснодар һәм Ставрополь крайҙарында, Одесса, Чкалов, Ростов, Днепропетровск һәм илебеҙҙең башҡа өлкәләрендә баҫыу станындарында һәм бригадаларында эшләгән колхозсыларға һәм машина-трактор станциялары работниктарына хеҙмәт күрһәтеү өсөн связдең күсмә агентстволарын ойошторҙо. Махсус фургондарға һәм автомашиналарға йыһазландырылған был агентстволар баҫыуҙарға хаттар, газеталар һәм журналдар ташыйҙар, телеграммалар тапшыралар һәм ҡабул итәләр.

Илдең совхоздары электрләштерелә

СССР совхоздар Министрстволығының совхоздары тотош электрләштереү эшен дауам итә. Ағымдағы йылда 400 хужалыкта электр станцияһы төҙеләсәк.

Яҡын өс йыл эсендә Министрстволың бөтә совхоздары ла электр энергияһы аласаҡ. Уларҙа ҙур хеҙмәт талап иткән процесстар: ашлыҡ һуғыу, таҙартыу, сортларға айырыу, киптереү һәм тартыу эштәре электрләштереләсәк. Электр көсө шулай уҡ ер һуғарыу, һыу менән тәьмин итеү, малдар өсөн аҙыҡ әҙерләү, һыйыр һауыу, һарыҡтарҙың йөндәрен ҡырҡыу һәм ауыл хужалығы продукцияларын эшкәртеү өсөн файҙаланыласаҡ.

Малдар өсөн аҙыкты мул әҙерләргә!

Бесән сабыу һәм силос һалыу башланды

АҠЪЯР. (Телеграф аша). Беҙҙең ауыл Советы территорияһындағы «Яңы шәрҡ» һәм «Йәш быуын» колхоздары бесәнгә төштөләр. Һәр ике колхозда ла мал аҙығы әҙерләү ойошҡан рәүештә башланды.

«Яңы шәрҡ» артеле болондарында ике бесән сапҡыс һәм 18 кеше ҡул салғыһы менән эшләй. Салғысы ҡатын-ҡыҙҙарҙан Әминә Иштанова, Хәмидә Билалова, Шәрифа Искужина, Хәбибә Муталова һәм башҡа иптәштәр көндәлек норманы арттырып үтәйҙәр. Бесән сабыу менән бергә, силос һалыу эше лә башланды. Ике көн эсендә 30 тонна силос һалынды.

«Йәш быуын» колхозында ла 60 тонна силос һалынды. Бесән сабыу ҙа ҡыҙыу бара. Бөтә сапҡыстар һәм салғылар эштә файҙаланылалар.

И. Торонтаев,
Хәйбулла районы, Бикбау ауыл Советы председателе.

Люцерна һәм костер сабалар

РАЕВКА. (Телефон аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Әлшәй районы «Ленинская победа» колхозы быйыл 800 гектар майҙанда бесән сабырға тейеш. Шуның 283 гектары сәселеп үҫтерелгән күп йыллыҡ үләндәр.

Колхоз бесән йыйнауҙы ваҡытында үткәреү өсөн яҡшы әҙерләнде. 6 бесән сапҡыс һәм 6 ат тырмаһы ремонтланды, башҡа инвентарҙәр етештерелде.

Быйыл мал аҙығын күберәк әҙерләү маҡсатында колхоз сәселеп үҫтерелгән үләндәрҙе ике тапҡыр сабасаҡ. Уларҙы тәүге тапҡыр сабып йыйнау эше башланды.

Хәҙер 38 гектар люцерна һәм 62 гектар костер сабылды. Бесән әҙерләүҙә бөтә машиналар ҙа эшләйҙәр. Колхозсы Федор Булашев һәм Александр Изякин иптәштәр көн һайын 3 гектар урынына, 3,5—4-әр гектар майҙандың үләнен сабалар.

Бесәнгә төштөләр

Абзан районы колхоздары береһе артынан икенсеһе бесән сабыуға төшәләр. Киң болондарҙа, йылға буйҙарында салғысылар төркөмө, бесән сапҡыстар күренәләр.

— Беҙҙең колхозда биш бесән сапҡыс эшләй, үлән яҡшы. Сабылған үлән бер көн ята, ә икенсе көндә йыйнап кәбәнгә һалына барыла, — ти Каганович исемендәге колхоздың малсылыҡ фермаһы мөдире иптәш Чебоксаров.

Стаханов исемендәге колхозда тәүге көндә үк 8 гектар бесән саптылар һәм икенсе көндә үк йыйнап кәбәндәргә өйҙөләр.

Мичурин, Максим Горький, Папанин исемендәге һәм «Көрәш» колхозларында ла бесән сабыу шулай уҡ ойошҡан рәүештә бара.

Һаҡмар совхозы бесәнгә 4 июндә үк төшкәйне. Совхоздың фермаларында 15 бесән сапҡыс һәм ике трактор бесән сапҡысы эшләй. 450 гектарҙан артыҡ бесән сабылды һәм уның 250 гектары эҫкерттәргә өйөлдө. Бесән әҙерләү буйынса ярышта 3-сө ферма алда бара. Трактор бесән сапҡысында эшләүсе Иван Матюшин көн һайын 13—15 гектар майҙандың бесәнен саба.

Әбйәлилдә быйыл бесән сабырға уйлайҙармы?

Хәҙер үлән өлгөрөп килә. Яҙҙың ямғырһыҙ килеүе үләндең өлгөрөү срогын тағы ла ҡыҫҡартты. Тиҙҙән уны сабырға мөмкин буласаҡ. Был хәл бесән сабыуҙы һәм йыйнауҙы бик ҡыҫҡа срокта үткәреүҙе талап итә. Ә бының өсөн яҡшы әҙерләнергә кәрәк.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, Әбйәлил районы бесән йыйнау кампанияһына әҙерлекһеҙ килә. Быйыл район 34.614 тонна бесән әҙерләргә тейешле. Был эште үҙ ваҡытында үткәреүгә бөтә мөмкинлектәр бар. Районда 125 сапҡыс, 120 ат тырмаһы иҫәпләнә. Эшсе көсө етерлек. Тәбиғи сабынлыҡтар күп. Ләкин райондың бер генә колхозында ла бесән сапҡыстар, ат тырмалары һәм башҡа инвентарҙәр ремонтланып әҙерләнеп бөтмәгән. Районда бөтәһе 6 сапҡыс, 7 ат тырмаһы ғына ремонтланған.

Райондың иң алдынғы ауыл хужалығы артеле — «Серп» колхозында 8 сапҡыс, 10 ат тырмаһы бар. Уларҙың береһенә лә ремонт башланмаған әле. «Октябрҙең 12 йыллығы» колхозы быйыл 788 тонна бесән әҙерләргә тейеш. Шулай уҡ бында ла колхоз етәкселәре был эште уңышлы башҡарып сығыу өсөн хәстәрлек күрмәйҙәр. 3 тырма, 3 сапҡыстың береһе лә ремонтланмаған.

«Алға» колхозы үҙған йылда бесән әҙерләүҙе районда беренсе булып тамамлағайны. Быйыл унда ла әҙерлек насар. Ҡул салғылары, тырма һәм һәнәктәр юҡ. Сапҡыстар ремонтланмаған. «Трактор» колхозында ла шул уҡ хәл. Бында ла колхоз етәкселәре «бесәнгә төшергә ваҡыт күп әле, өлгөрөрбөҙ» тигән зарарлы ҡараш менән йәшәйҙәр. Яҡшы йыһазландырылған тимерлек була торон, 4 ат тырмаһының, 4 сапҡыстың береһе лә ремонттан үткәрелмәгән.

Район ауыл хужалығы бүлегендә лә бик тыныс. Әҙерлектең насар барыуы тураһында һүҙ ҡуҙғатҡан кеше лә юҡ. Зоотехниктәр колхоздарҙа булмайҙар, бесән йыйнауға әҙерлек менән етәкселек итмәйҙәр. Колхоздарға әле булһа бесән әҙерләү буйынса план, графиктәр еткерелмәгән.

Х. Баимов.

1700 центнер бесән әҙерләнде

ЕРМОЛАЕВКА. (Телефон аша). Райондағы йылҡысылыҡ заводында мал аҙығы әҙерләү киң йәйелдерелде. 18 июнгә 220 гектар майҙандың үләне сабылды. 1700 центнер бесән эҫкерттәргә өйөлдө.

Бесән әҙерләүҙә Сандин иптәш етәкселек иткән участка алда бара. Эҫкертләүҙә Ғафаров һәм Львов иптәштәр яҡшы эшләйҙәр.

Яр. Валиев.

Сапҡыстар ремонтланмай

Ҡариҙел районы болондарында бесән өлгөрә. Уны ваҡытында, йәһәт йыйнап алыу — колхоздарҙа общественный малдарҙы туҡ ҡышлатыуҙы тәьмин итәсәк. Бының өсөн бесән әҙерләү кампанияһына яҡшы әҙерләнергә кәрәк. Ләкин районда был эш сиктән тыш насар тора.

Молотов исемендәге колхоз быйыл 250 гектар майҙанда бесән сабырға һәм 200 тонна силос һалырға тейеш. Колхозда бер сапҡыс машина бар. Ләкин ул да ремонтланмаған, тутығып ята. Ҡул салғыһы, тырма һәм һәнәктәр бөтөнләй әҙерләнмәйҙәр әле.

«Новый свет», «Труженик», «Завет Ильича», Чапаев һәм Куйбышев исемендәге колхоздарҙа ла шундай уҡ хәл. Райондағы 40 бесән сапҡыс машинаның 23-һе генә ремонтланған.

Ғ. Исмаев.

Хәстәрлек юҡ

Йомағужа районында әле күпселек колхоздар бесән сабыуға әҙерлекте тамамламағандар. Хатта әҙерлек эштәрен бөтөнләй башламаған колхоздар ҙа юҡ түгел. «Нөгөш» колхозында бесән сапҡыс һәм бесән йыйғыстар ремонтланмағандар. «Шишмә» һәм «Ҡыҙыл йондоҙ» колхоздарында ла бесән йыйнауға әҙерлек алып барылмай. Сталин һәм Карл Маркс исемендәге колхоздарҙа тимерлектәр бикле, тимерселәр юҡ.

Район ауыл хужалығы бүлеге (мөдире иптәш Ғафаров) мал аҙығы әҙерләү эшенә етәкселек итмәй. Районда күпме бесән сапҡыс һәм йыйғыс булыуы, уларҙың ремонтланыуы йәки ремонтланмауын белмәй. Колхоздарға бесән сабыу планы һәм графиге бирелмәгән. Был мөһим кампанияны уңышлы үткәреү өсөн хәстәрлек юҡ.

Ф. Гималетдинов.

Мал аҙығы әҙерләйҙәр

«8 март» колхозы Ғафури районында беренсе булып 8 июндә бесән саба башланы. Бер нисә көн эсендә 20 гектарға яҡын бесән сабылды, 45 тонна силос һалынды.

«Йондоҙ», «Бурлы», «Вольная жизнь» колхоздарында ла силос һалыу һәм япраҡ әҙерләү яҡшы бара.

Райондың башҡа колхоздары ла яҡын көндәрҙә бесәнгә төшәсәктәр.

Йәғфәр Ғәлиев.

Иген тапшырыу пункттарына работниктәр әҙерләү

ХАРЬКОВ. (ТАСС). «Югозаготзерно»ның уҡытыу комбинаты иген тапшырыу пункттарының етәксе работниктәренең беренсе группаһын уҡытып сығарҙы. Бында 132 директор һәм уларҙың урынбаҫарҙары, 85 лаборатория мөдире, 40 механик һәм 38 мастер уҡып сыҡты. 3 ай эсендә улар иген әҙерләү эштәренең техникаһын өйрәнделәр.

Ошо көндәрҙә бесән әҙерләү пункттары механиктәре группаһы уҡый башлаясаҡ.

Мәктәптәр өсөн 450 миллион дәфтәр

Целлюлоза һәм ҡағыҙ промышленносе Министрстволығы предприятиелары мәктәп балалары өсөн дәфтәр эшләп сығарыуҙы арттыра. Игуарск комбинатында, Добрушка һәм Полотняно-заводск фабрикаларында яңы ҙур агрегат стройға инде. Уҡыу әйберҙәре эшләүселәр — Камск комбинаты һәм Пензаның «Маяк революции» фабрикаһы продукция эшләп сығарыуҙы ике тапҡырға арттырҙылар.

Мәктәптәрҙә уҡыуҙар башланғанға тиклем 250 миллион, ә йыл аҙағына тиклем тағы ла 200 миллион дәфтәр етештереү билдәләнгән.

СТАЛИН ПРЕМИЯҺЫ ЛАУРЕАТТАРЫ

Зелинский Николай Дмитриевич—Сталин премияһы лауреаты, академик, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университетенең профессоры. Беренсе дәрәжәләге Сталин премияһы белок химияһы өлкәһендә оҙаҡ йылдар фәнни тикшеренеүҙәре өсөн бирелде.

Гуревич Михаил Иосифович — Сталин премияһы лауреаты, самолеттар төҙөү буйынса баш конструктор. Беренсе дәрәжәләге Сталин премияһы яңы тип хәрби самолет төҙөүҙә ҡатнашҡаны өсөн бирелде.

Гаврилов Николай Иванович — Сталин премияһы лауреаты, М. В. Ломоносов исемендәге Мәскәү государство университетенең профессоры. Беренсе дәрәжәләге Сталин премияһы белок химияһы өлкәһендә оҙаҡ йылдар фәнни тикшеренеүҙәре өсөн бирелде.

Лавочкин Семен Алексеевич — Сталин премияһы лауреаты, Социалистик Хеҙмәт Геройы, самолеттар төҙөү буйынса баш конструктор. Беренсе дәрәжә Сталин премияһы хәрби самолеттарҙың яңы типтарын төҙөгән өсөн бирелде.

Микоян Артем Иванович — Сталин премияһы лауреаты, самолеттар төҙөлөшөнөң баш конструкторы. Беренсе дәрәжә Сталин премияһы яңы типтағы хәрби самолет төҙөүҙә ҡатнашҡаны өсөн бирелде.

БӨЙӨК ВАТАН ҺУҒЫШЫНЫҢ БАШЛАНЫУЫНА ЕТЕ ЙЫЛ ТУЛЫУҒА ҠАРАТА

Гитлер Германияһының СССР-ға мәкерле рәүештә һөжүм башлауына ете йыл тулды. Һуғыштың бөтә ауырлығын үҙ елкәһендә үткәргән совет халҡы 1941 йылдың 22 июнь көнөн — механизировать ителгән немец-фашист армияһының беҙҙең социалистик Тыуған илебеҙ сиктәренә баҫып ингән көндө бер ваҡытта ла онотмаҫ.

1914—1918 йылдарҙағы һуғыштан сығып, Германия империалистәре Англияның, Францияның һәм Америка Ҡушма Штаттарының илдәре итеүсе круптарының тулы хупланыуында, гитлерсе фашистик режим төҙеүҙәр һәм яңы бөтә донъя һуғышына ҡоторған рәүештә әҙерләнә башланылар.

АҠШ-тың финанс магнаттары ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ҡеүәтле хәрби-экономик база төҙөргә Гитлерға ярҙам иттеләр, ә англо-француз империалистәре, Советтәр Союзы арымай-талмай тәҡдим иткән коллектив имиселектән баш тартып, немец агрессияһына ҡаҡшаҡ астылар һәм икенсе бөтә донъя һуғышын башлап ебәреүҙә Гитлерға булышлыҡ иттеләр. «...Англия менән Франция, — тине В. М. Молотов Октябрҙең 30 йыллығына арналған докладында, — фашистик Италия менән берләштеләр һәм герман фашистәрен Советтәр Союзына һөжүмгә тиҙерәк этәрер өсөн, гитлерсе Германия менән хурлыҡлы Мюнхен килешеүен төҙөнөләр. Ләкин англо-француз империалистәренең иҫәптәре барып сыҡманы. Улар үҙҙәре ҡорған ауға үҙҙәре эләктеләр, ә тәрән аҡыллы сталинсе тыныслыҡ политикаһы Советтәр Союзы өсөн һуғыш башланыуын яҡынан киҫектәрен тороуҙы гүзәл рәүештә тәьмин итте».

Гитлерсе ҡәрән чума — фашизм кешелек донъяһына, бөтә донъя цивилизацияһына ҡот осҡос ҡурҡыныс килтерҙе. 1941 йылдың яҙына баҫып алынған Европа илдәрендә фашистар миллионлаған кешеләрҙе колонка төшөрҙөләр, ҡол биләүселекте һәм крепостнойлыҡты ҡайтанан торғоҙҙолар. Освенцим, Бухенвальд, Маутхаузен, Дахау кеүек ғәйәт ҙур «үлем комбинаттарында» кешеләрҙе массовый рәүештә ҡырыуҙы ойоштороҙолар. Донъя йөҙөндә азатлыҡ һөйөүсе халыҡтарҙы бөтөнләй ҡырып бөтөрөү һәм колонкаға төшөрөү ҡурҡынысы килеп баҫты.

Гитлер һәм уның тарафынан шымартылған фашистик банда «йәшен тиҙлегендәге» һуғышта Көнбайыш Европа илдәрен еңеп, Совет Армияһын да еңел генә тар-мар итмәксе һәм Совет государствоһын юҡ итмәксе булдылар; социализмде барлыҡҡа килтереүсе һәм тәҙеүсене — бөйөк Совет халҡын—үҙҙәренең «кенсыһыш» ҡолдарына әйләндермәксе булдылар. «Беҙ Рәсәйҙе, — тип белдерҙе Гитлер бөтә донъяға, — ул башҡа бер ваҡытта ла ҡалҡына алмаҫлыҡ итеп юҡҡа сығарасаҡбыҙ».

Ләкин гитлерселәр, ә улар менән бергә уларҙың англо-американ лагеренән булған йәшерен һәм асыҡ дуҫтары ла Советтәр Союзы еңелер тигән үҙҙәренең өмөттәрендә бик ныҡ яңылыштылар.

Гитлер Германияһының иҫкәрмәҫтән, мәкерле рәүештә, юлбаҫарҙарса һөжүм итеүе бөтә совет илен берҙәм хәрби лагерғә әйләндерҙе. Тыуған илебеҙ өсөн иң ауыр был көндәрҙә Бөйөк Сталин Совет государствоһының обороннаһын үҙ етәкселегенә алды. Большевиктәр партияһы Совет Армияһының һәм хеҙмәтсәндәрҙең бөтә көстәрен дошманға отпор биреүгә берләштерҙе.

Прибалтикала, Белоруссия һәм Украина яландарында, Ленинград һәм Одесса тирәһендә йәйелгән грандиоз һуғыштарҙа Сталиндең полководецлек гение тарафынан етәкселек ителгән Совет Армияһы немецтәрҙе хәлдән тайҙырҙы һәм ҡаҡшыратты һәм 1941 йылдың декабрендә Баренц диңгеҙенән алып Ҡара диңгеҙгә тиклем һуҙылған бөтә фронтта уларҙы туҡтатты.

Совет Армияһы көс һәм тәжрибә туплап, 1941 йылдың декабрендә контр һөжүмгә күсте һәм Мәскәү, Тихвин һәм Ростов тирәһендә немец-фашист армияларының төп көстәрен бик ауыр еңелеүҙәргә дусар итте. Был — Гитлер армияһының еңелмәүселеге тураһындағы ямаманы сыҡҡан әкиәттең көлөн күккә осорған совет ғәскәрҙәренең бөтә донъяла тарихи еңеүе булды.

1941 йылда иптәш Сталин тарафынан ойошторолған стратегик оборонаның һәм контр һөжүмдең көсө шул тиклем ҙур булды, немецтәр был ударҙан бары тик 1942 йылдың йәйендә генә ҡалҡына алдылар. Улар шул ваҡытта икенсе фронттың булмауынан файҙаланып, үҙҙәренең бөтә көстәрен йыйҙылар һәм аҙаҡтан Мәскәүгә табан боролоп, башҡаланы көнсығыштан уратып алыр өсөн, Сталинград йүнәлешендә һөжүмгә күстеләр. «Үҙған йылдың йәйендә, немецтәр һөжүменең беренсе айҙарындағы кеүек, бөтә өс йүнәлеш буйынса — көньяҡҡа, төньяҡҡа, үҙәккә табан бер үк ваҡытта һөжүм алып барыр өсөн, күрәһең, немецтәр ул тиклем үк көслө түгелдәрҙер...», — тине иптәш Сталин ул ваҡыттарҙа.

Һуғыштар тарихендә иң ҙур һуғыш булған Сталинград янындағы иң ҡаты ҡан ҡойғос һуғышта, Мәскәүгә икенсе тапҡыр һөжүм яһау өсөн йыйылған 330 меңле немец армияһы туҡтатылды, ҡаҡшыратылды һәм шунан һуң ҡамап алынды һәм тулыһы менән юҡ ителде һәм әсиргә алынды.

Сталинград немец-фашист армияһы өсөн ҡояш байыуы булды. Ул Сталинград тирәһендә еңелгәндән һуң инде ҡалҡына алманы. 1943 йылда немецтәр Курск бөгөлөндә һөжүм ойошторорға һуңғы тапҡыр тырышып ҡаранылар, ләкин Совет Армияһы үҙе контр һөжүмгә күсте, Орел һәм Белгород тирәһендә немецтәрҙең йыйылған ҙур көстәрен тар-мар итте һәм немец-фашист армияһын катастрофа алдына ҡуйҙы.

Мәскәү, Сталинград һәм Курск тирәһендә гитлерсе армияға ҡаршы бер үҙе һуғышҡанда Совет Армияһының өлгәшкән грандиоз өс еңеүе, немецтәрҙең тулыһынса һәм бөтөнләй еңелеүҙәрен алдан уҡ хәл итте. 1944 йылда беҙҙең ҡоралды көстәребеҙ немец оккупанттарына ун тапҡыр емергес удар яһанылар һәм уларҙы Советтәр Союзы территорияһынан ҡыуып сығарҙылар. 1945 йылда үҙҙәренең хәрәкәттәрен Германия территорияһына сығарып, беҙҙең ғәскәрҙәребеҙ фашистар өңө — Берлин өҫтөнә үҙҙәренең еңеү байрағын ҡаҙанылар.

1941 йылдың ауыр көндәрендә иптәш Сталин Совет Армияһы воиндәре алдына: илебеҙ өҫтөнә күтәрелгән ҡурҡынысты бөтөрөү генә түгел, бәлки герман фашизме иҙеүе аҫтында интегеүсе Европа халыҡтарына ярҙам күрһәтеүҙе лә бурыс итеп ҡуйҙы.

«Бөтә донъя беҙгә немец илбаҫарҙарының талауы яуҙарын юҡ итергә һәләтле көс итеп ҡарай, — тине иптәш Сталин. — Немец илбаҫарҙарының иҙеүе аҫтына эләккән, ҡол ителгән Европаның бөтә халыҡтары беҙҙе үҙҙәрен азат итеүселәр итеп ҡарайҙар».

Совет Армияһы гитлерсе Германияһы һәм уның союзниктарын тар-мар итеүҙә хәл иткес роль уйнаны һәм үҙенең бөйөк тарихи, азатлыҡ миссияһын достойно рәүештә үтәне. Дошманды тар-мар итеүҙә Советтәр Союзының хеҙмәте достойно рәүештә донъялағы бөтә халыҡтар тарафынан баһаланә.

Ләкин хәҙер, икенсе бөтә донъя һуғышы тарихен боҙоп күрһәтеүсе англо-американдар һәм башҡалар фактыларға ҡапма-ҡаршы рәүештә Совет Армияһы еңеүҙәренең халыҡ-ара әһәмиәтен кәметеп күрһәтергә һәм үҙ уныштарын арттырып күрһәтергә маташалар. Ләкин Африкала һәм Италияла аҙ ғына һанлы немец армияһына ҡаршы йәки тотал мобилизация буйынса йыйылған инвалидтарға ҡаршы Көнбайыш Европала алып барылған операцияларҙа ниндәй уныштар булыуы мөмкин? Хатта союзниктар өсөн бик унайлы булған шарттарҙа ла — 1944 йылдың декабрендә немецтәр Арденнала фронтты өҙөп үткәс, һәм Черчилль Генералиссимус Сталинға ярҙам һорап мөрәжәғәт итергә мәжбүр булды. Совет Армияһы үҙенең Верховный Башкомандующиһының приказы буйынса билдәләнгән ваҡыттан алда һөжүмгә күсте, көнбайышта немецтәрҙең ҡыҫыҡ һөжүмен өҙҙө һәм англо-американ армияларына үҙ хәүефтәрендә немецтәргә ҡаршы һөжүмгә күсергә мөмкинлек бирҙе.

Польша, Чехословакия, Югославия халыҡтары һәм фашистик хөкүмәттәрҙең ғәйебе буйынса гитлерсе Германия лагерендә булыусы Венгрия, Румыния, Болгария, Финляндия халыҡтары Совет Армияһы ҡулынан үҙҙәренә азатлыҡ алғандарын бөтә донъя белә. Мәскәү һәм Сталинград янында, Курск янында, Днепрҙа, Белоруссияла һәм Висла йылғаһында Совет Армияһының бөйөк еңеүҙәре Францияны, Бельгияны, Голландияны, Норвегияны һәм Данияны азат итеүҙең башланыуы булды. Советтәр Союзы һәм уның ҡоралды көстәре Европаның һәм бөтә донъяның цивилизацияһын фашистик илбаҫарҙарҙан ҡотҡарҙы. Кешелек донъяһы алдында совет халҡының бөйөк хеҙмәте бына ошонда.

Фашистик Германия һәм империалистик Япония өҫтөнән Советтәр Союзының еңеү йылдары тарихҡа китеп иң тиклем алыҫлашһа, беҙҙең совет халҡының хәрәкәт итеүсе көстәре һәм ҡеүәтенең сығанаҡтары шул тиклем яҡтыраҡ һәм мәһабәтерәк булып күренерҙәр. Совет социалистик ҡоролошо, уны ныҡытыу өсөн совет кешеләре үҙ көстәрен йәлләмәгән ҡоролош, иң ныҡ һәм йәшәүгә иң һәләтле булып сыҡты. Ул беҙҙең халҡыбыҙға фашистик Германияға ҡаршы һуғышыу өсөн еңелмәҫ көс бирҙе һәм беҙҙең тулы еңеүебеҙҙе тәьмин итте.

Бөйөк Ленин Совет власеның тыуыу таңында уҡ: «Эшсе һәм крәстиәндәрҙең күпселеге хеҙмәтсәндәрҙең үҙ, Совет власен яҡлағандарын белгән, тойған һәм күргән халыҡты бер ваҡытта ла еңә алмаҫтар» тине.

Совет государствоһы үҙенең дошмандарынан — бөтә донъя реакцияһы яҡлауып алған Европалағы фашистик һәм фашистәр яҡлы государстволарҙан күл тапҡырға көслө булып сыҡты.

Ватаныбыҙ өҫтөнә ябырылған дәһшәтле ҡурҡыныс көндәрендә Ленин—Сталин партияһы герман фашистәренә ҡаршы бөтә халыҡ ҡорашен ойоштороусы һәм рухландырыусы булды. Коммунистар һәм комсомолецтар фронтта һәм тылда гәйрәтлелек, ҡурҡа белмәү һәм героизм өлгөләре күрһәтеп, һәр ваҡыт көрәштең иң алдынғы һәм ҡурҡынысы участкаларында булдылар.

Ленин—Сталин партияһы беҙҙең халҡыбыҙҙы үҙ социалистик Тыуған иленә сикһеҙ бирелгәнлек рухында, совет патриотизме рухында тәрбиәләне. Совет патриотизме халҡыбыҙҙы тылда хеҙмәт подвигтарына һәм фронтта мәңге балҡыясаҡ батыр подвигтарға күтәреүсе ҡеүәтле көс булып әүерелде. Бөйөк Ватан һуғышында Советтәр Союзының өлгәшкән бөйөк еңеүҙәре бөйөк юлбашсыһы һәм полководец Иосиф Виссарионович Сталиндең тәрән аҡылы һәм гениаль етәкселеге аҫтында әҙерләнделәр һәм тормошҡа ашырылдылар.

Совет Армияһы халыҡ-ара империализмдең һөжүмен кире ҡаҡты һәм иң көслө һәм мәкерле дошманға ҡаршы бер үҙе һуғышып еңеп сыҡты. Ул иптәш Сталин етәкселегендә алдынғы совет хәрби фәненә эйә булды һәм совет халҡының интерестарен уңышлы рәүештә яҡларға һәләтле, хәҙерге замандың иң ҡеүәтле армияһына әйләнде.

Фашистик Германияға һәм империалистик Японияға ҡаршы һуғышты тамамланғандан һуң өс йыл ваҡыт үтте. Немец оккупанттары тарафынан яһалған яраны иң ҡыҫҡа ваҡыт эсендә уңалтыу өсөн совет халҡы әле һуғыш барған ваҡытта уҡ хеҙмәт фронтында көслө һөжүм башлағайны. Совет кешеләре үҙ көстәре, үҙ средстволары менән илдең халыҡ хужалығын ҡайтанан ҡорҙолар, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың беренсе ике йылы пландың уңышлы рәүештә үтәлеүе, биш йыллыҡтың өсөнсө йылын хәл иткес уңыштар менән билдәләнеләр һәм шуның менән уны дүрт йылда үтәү өсөн шарттар әҙерләнеләр.

Советтәр Союзында һәм яңы демократия илдәрендә социализмдең уңыштарынан борсолған халыҡ-ара реакция өсөнсө бөтә донъя һуғышы пландарын әҙерләй. Тар-мар ителгән гитлерселәр урынын алған яңы һуғыш тоҡандырыусылар ҡоторонған рәүештә һуғыш пропагандаһы алып баралар. Улар ҡыҫҡырыныу, авиация һәм атом ҡоралы ҡулланыу менән янап, донъяның тыныслыҡ һөйөүсе халыҡтарын ҡурҡытырға һәм уларҙы тыныслыҡ, азатлыҡ, прогресс һәм демократия эшенә тоғро булыуҙан баш тартырға мәжбүр итергә уйлайҙар.

Үҙ көстәренә һәм үҙ эштәренең хаҡлығына ышанған, тыныс совет халҡы тайпылышһыҙ рәүештә тыныслыҡ политикаһы үткәрә һәм халыҡ-ара империалистәрҙең һәм дипломатия генералдарының сығыштарын бик һиҙгер рәүештә күҙәтеп тора.

«Тыныслыҡтың ысын дуҫтары бәтәбе лә, — тип белдерҙе В. М. Молотов, — ә улар телә͏һә ниндәй ил халҡының иң ҙур күпселеген тәшкил итәләр, — Советтәр Союзының дөйөм тыныслыҡ интерестарен ахырына тиклем яҡлаясағына ышана алалар».

В. Воробьев,
Генерал-лейтенант.

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ МАШИНАЛАРЫНА ҺӘМ ТРАКТОРҘАРҒА ЗАПАС ЧАСТӘРҘЕ КҮБЕРӘК ЕТЕШТЕРЕРГӘ

Башҡорт АССР-ының урындағы промышленность предприятиелары быйылғы йылда ауыл хужалығы машиналары һәм тракторҙар өсөн запас частәрҙе үткән йылға ҡарағанда ике тапҡырҙан күберәк етештерергә тейештәр. Быны өлгәле башҡарыу өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар.

Шулай ҙа әле ҡайһы бер предприятие етәкселәре үҙҙәренә тапшырылған был мөһим эшкә ошо көнгә тиклем яуапһыҙ ҡарап киләләр. Мәҫәлән, Башметаллпромсоюз системаһына ҡараған Иглиндәге «Металлист» артеле (председателе иптәш Черепанов) беренсе кварталда ауыл хужалығы машиналарына ике мең комплекттән артыҡ һәр төрлө деталдәр ҡуйорға тейеш ине. Башметаллпромсоюз етәкселәренең (управляющие иптәш Киселевич) борола алмаусылығы һәм кәкерт менән ваҡытында тәьмин итмәүе арҡаһында артель заданиене тик 10 июндә генә үтәүгә башланы. Башметаллпромсоюз башҡа деталдәрҙе етештереү буйынса ла государство алдында ҙур бурыслы булып тора. Ул елгәргес машиналарҙың иләктәре өсөн 3,5 мең метр селтәр биреп еткермәне.

Республиканың урындағы промышленность Министерствоһының Благовещен райпромкомбинаты (директоры иптәш Гушинский) комбайндарға запас частар етештереүҙен биш айлыҡ заданиеһен бары 30 процентҡа ғенә үтәне. Ләкин заданиеның бындай хурлыҡлы рәүештә өҙөлеүе урындағы промышленность Министерствоһы етәкселәрен һис тә борсомай.

ВКП(б)-ның Иглин райкомы ла «Металлист» артеленең эшен тейешенсә контролгә алмай.

Запас частар етештереүҙең яуаплылығын һәм мөһимлеген аңлаған урындарҙа заданиеларҙың үтәлеше лә яҡшы. Бының өсөн тракторҙарға һәм комбайндарға запас частар эшләп сығарыуҙың биш айлыҡ заданиеһен 166 процентҡа үтәгән МВД-ның ремонт-техник базаһын (директоры Бонитенко, парторгы Давыдов иптәштәр) күрһәтергә мөмкин. Ремонт базаһы коллективе үҙ-ара социалистик ярышты йәйелдереү, оборудованиеларҙың ҡеүәтен тулыһынса файҙаланыу һәм сырье, материалдарҙы һаҡлыҡ менән тотоноу һөҙөмтәһендә ошо йылдың биш айында пландан тыш 1.600-ҙән артыҡ төрлө деталдәр бирҙе.

Был йәһәттән яҙыу машиналары заводы (директоры Ракитин, парторгы Серов иптәштәр) коллективе ла тапшырылған бурысты уңышлы рәүештә башҡарып килә. Завод биш айҙа комбайндарға запас частәр етештереү заданиеһен 115 процентҡа үтәне.

Республиканың социалистик ауыл хужалығы иң яуаплы осор—урожай йыйыу алдында тора. Шуға күрә урындағы промышленность предприятиелары работниктәре ауыл хужалығы машиналарына һәм тракторҙарға запас частәрҙе күберәк етештереү, уларҙың сифатын яҡшыртыу өсөн үҙ-ара социалистик ярышты киңерәк йәйелдерергә бурыслылар.

А. Кальметьев.

Радио тапшырыуҙар насар ойошторола

Асҡын районында урындағы радио тапшырыу күптән бирле эшләп килә. Үҙған йылдарҙа тапшырыуҙар яҡшы ойошторола ине.

Ләкин быйыл — киреһенсә. Редактор иптәш Вәлиеваның һалҡын ҡарауы арҡаһында, тапшырыуҙар бик һирәк була һәм эстәлекһеҙ, ҡоро информациялар менән генә сикләнә. Әҙәби, фәнни, политик темаларға, район етәкселәренең, ауыл хужалығы белгестәренең, алдынғы звено етәкселәренең, колхоз председателдәренең сығыштары ойошторолмай. Мәҫәлән, май айында иң бары 15—20 минутлыҡ 12 генә тапшырыу булып, уларҙың да күберәге районда сыға торған «Социализм юлы» һәм «Путь социализма» газеталарын башынан аҙағына тиклем уҡып сығыуға ғына ҡайтып ҡалды. 9 май көнөндә радио бөтөнләй эшләмәне. Әҙәби-музыкаль сығыштар булғаны ла юҡ. Тапшырыуҙар осраҡлыҡтан-осраҡлыҡҡа, планһыҙ алып барыла.

Ғ. Исмәғилов.

Башҡаланың телефон аппараттары заводы токаре Р. К. Булгаков иптәш производствонан айырылмайынса уҡып, электро-механик техникумын уңышлы тамамланы.

Һүрәттә: Р. К. Булгаков (уңда) үҙенең урынында эшләү өсөн токарлеккә Б. И. Ренковецкийҙе (һулда) яңы профессияға өйрәтә.

В. Жданов фотоһы.

Ишембай—Ермолаевка тимер юл төҙөлөшөндә

Стәрлебаш районы участкаһында

Стәрлебаш районы хеҙмәтсәндәре Ишембай—Ермолаевка тимер юлында 6 километр оҙонлоҡонда юл полотнаһы эшләргә тейештәр. 10 июндән участкала ҡаҙыу эш башланды.

«Коммунар», «Ҡыҙылармеец», Ленин һәм Матросов исемендәге колхоздар айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Колхозсылар нормаларҙы 120—130 процентҡа үтәйҙәр. Үҙенең намыҫлы хеҙмәте менән «Коммунар» колхозының Рахмаҡулов етәкселек иткән төҙөүселәр бригадаһы районың күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды.

Юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге

Красноусол. (Телефон аша). Трассала Ғафури районының 600-ҙән артыҡ колхозсыһы эшләй. Колхозсылар, үҙ-ара ярышып эшләп, юғары хеҙмәт етештереүсәнлеге бирәләр һәм һәр көндә 1400 — 1500 кубометр ер ҡаҙыйҙар.

«Красный остров», «Ҡорһантау», «Игек йылға», «Ҡыҙыл ташкүл» колхоздарының комсомол-йәштәр бригадалары көндәлек 45 кубометр заданиене, 140-ар кубометрға еткереп үтәйҙәр.

Йәғфәр Ғәлиев.

Темп түбән

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә эшләүсе Күгәрсен районы колхоздары мәләүезлеләр саҡырыуына ҡушылып, заданиеләрҙе срогынан алда үтәүгә йөкләмә алғайнылар. Ләкин вәғәҙә үтәлмәй.

Район бөгөнгә көнгә тиклем әле юлға билдәләнгән һанда эшсе көстәре сығарып бөтмәне. Трассала 2 мең урынына бары 770 кеше, 120 урынына 58 генә ат эшләй. Нормалар 50—60 процентҡа генә үтәлә.

Федоровка районы участкаһында ла ошондай уҡ хәл. Бында һәр көндә 2.500 кубометр ер эштәре башҡарылырға тейеш. Ләкин иң бары 800—900 кубометр ғына ер ҡаҙыла һәм ташыла. Был заданиенең өстән бер өлөшө генә, тигән һүҙ.

Күгәрсен, Федоровка районлары эш темпын ҡырҡа көсәйтергә, алған йөкләмәләрҙе намыҫ менән үтәргә тейештәр.

Яңы китаптар

„Сыуаҡ таш“

П. Бажов әкиәттәре, Башгосиздат баҫмаһы. 1948 йыл.

Китапҡа Уралдың ҡарт яҙыусыһы — Сталин премияһы лауреаты П. Бажовтың: «Ҡарт тауҙар бүләге», «Сыуаҡ таш», «Алтын сәс», «Демидов сәкмәндәре» һәм «Тараҡан һабыны» тигән гүзәл әҫәрҙәре индерелгән.

Был китаптың беҙҙең өсөн әһәмиәте бигерәк тә шунда: ул бик тәрән һәм художестволы итеп халыҡтар туғанлығы тураһында һөйләй. Башҡорт халҡын, Демидов кеүек, ҡомһоҙ йыртҡыстарса алдаусыларҙың ысын йөҙҙәрен асып күрһәтә.

«Сыуаҡ таш» йыйынтығына ингән әкиәттәрҙе уҡығанда, һин уларҙың әкиәт икәнлеген бөтөнләй онотаһың, күҙ алдында реаль кешеләр хәрәкәт итәләр. Ул саҡтағы тормоштоң тап шулай булыуына һис бер шик ҡалмай. Көнсөлдә иҙеүселәргә ҡаршы нәфрәт ҡабына.

Боронғо халыҡ әкиәттәрен Бажов кеүек оҫта, социалистик реализмға яҡынайтҡан яҙыусылар бик һирәк. Был ҡарт яҙыусы Урал әкиәттәре менән бөгөнгө һорауҙарҙан сығып эш күрә. Уның оҫта үҙенсәлекле теле, үткер ҡәләме әкиәттәрҙә күрелмәгән ҙур художество юғарылығына күтәрәләр.

— «Был ерҙе аҙағына тиклем тапһаң, боронғо бер әкиәткә барып етеүең бар. Тик башҡорт әкиәтеме ул, әллә рустыҡымы, белмәйем, кемдекелер инде. Беҙҙең яҡта был йәһәттән шулай бергә буталып китеүҙәр бар инде ул. Рус семьяһында, әйтәйек, Фатима тигән берәй башҡорт ҡатыны телгә алына, ә башҡорт семьяһына баҡһаң, беҙҙең шунда берәй Маша—Наташа барып ингән була. Билдәле инде, элек-электән башҡорттар рустар менән заводта бер үк эштә булып килгәндәр. Рудниктарҙа ла, прискаларҙа ла бергә нужа күргәндәр. Шулай булғас, кешеләрҙең йыры ла, әкиәте лә, хатта ҡандары ла аралашып китеүе тәжәп хәл түгел».

«Ҡарт тауҙар бүләге» әкиәтендә беҙ шул һүҙҙәрҙе уҡыйбыҙ. Салауат батыр ҡылысы тураһындағы был гүзәл әкиәтте завод эшсеһе Митрич бабай һөйләй.

«Сыуаҡ таш» әкиәтендә Урал шахтерҙарынан Максим Вахоев менән башҡорт Садиҡ Үзәсевтең туғанлығы һәм уларҙың икәүләп, аҫыл таштар алып, В. И. Ленинға ҡәнәшкә барыуҙары тураһында һөйләнә. Был мауыҡтырғыс әкиәт реалистик тонда яҙылған хикәйәгә әйләнә.

Улар Илмән тауҙарындағы байлыҡты Ленинға күрһәтәләр. Шунан һуң, Ленин был тауҙағы хазинаны һаҡлау тураһында декрет сығара... Беҙ был ике ҡарт образында — Уралдың үҙ хужаларын күрәбеҙ.

Китапҡа ингән бөтә әкиәттәр Ватанға булған һөйөүҙе тәрбиәләйтәләр, әҙәби матурлыҡ тойоу тәрбиәләйҙәр. Башгосиздат был ҡарт яҙыусының әҫәрҙәрен баҫып сығарып бик яҡшы эш эшләгән. Уны башҡорт һәм татар уҡыусылары бик шатланып ҡаршы аласаҡтар.

„Баснялар“

Мәжит Ғафури, Башгосиздат баҫмаһы. 1948 йыл.

Башҡорт һәм татар халҡының һөйөклө шағиры Мәжит Ғафуриҙың әҙәби мираҫында баснялар ҙур урын алып тора.

Халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың баснялары ҡараңғы батшалыҡ замандарында яҙылғандар һәм улар шул замандың кешеләрен һәм общество тәртиптәрен тәнҡит итәләр. Уларҙың күбеһе 1907—1914 йылдарҙа яҙылған.

Был йыйынтыҡҡа халыҡ шағиренең 18 басняһе индерелгән. Китап «Мәктәп библиотекаһы» серияһында сыҡҡан. Тимәк, уны революцияға тиклем булған ауыр тормошто бик аҙ күҙ алдына килтерә алған балалар уҡыясаҡтар.

Йыйынтыҡты төҙөүсе Афзал Ҡудаш иптәш китапҡа, балаларға аңлашылырлыҡ итеп ҙур булмаған һүҙ башы бирергә тейеш ине. Ләкин был эшләнмәгән, классик әҙәбиәтте йәш уҡыусыларға тамам төшөндөрөү өсөн был ғына етмәй әле. Мәжит Ғафури баснялерендә йәш уҡыусыларға бөтөнләй аңлашылмай торған һүҙҙәр бар. Мәҫәлән, «Золом», «Ғажиз», «Форсат» һәм башҡа шундай ғәрәп, фарс һүҙҙәре күп осрай. Уларға аңлатма биреү һис шикһеҙ кәрәк ине.

ЙЫЛЛЫҠ ПЛАН — 7 НОЯБРГӘ!

Нефть сығарыу арта бара

ОКТЯБРЬСК. Ленин орденле «Туймазынефть» тресының алдынғы беренсе промыселе коллективе был көндәрҙә айырыуса ныҡышмалы эшләй. Алынған күтәренке йөкләмәләрҙе срогына үтәүҙе тәьмин итеү өсөн нефтселәр эш темпын көндән-көн үҫтерә баралар. Әгәр промыселдә июндең беренсе декадаһында нефть сығарыуҙың тәүлек планы 110,7 процентҡа үтәлһә, хәҙер үтәлеш 113—115 процент тәшкил итә.

Был үҫеш башлыса коллективтың производство күтәрелешен ойоштороу-техник сараларҙы тормошҡа ашырыу менән дөрөҫ ҡушып алып барыуынан килә. Һуңғы көндәрҙә нефть ҡатламдары баҫымының түбәнәйеүе сәбәпле ҡайһы бер фонтан скважиналар тәрән насосларға күсерелгәйне. Уның һөҙөмтәләре насарҙан түгел. Мәҫәлән, ошондай 121-се номерлы скважина нефтте ғәҙәттәгегә ҡарағанда байтаҡ артыҡ бирә.

Промыселдә тәрән насослы скважиналарҙы график буйынса ҡағиҙәләргә ярашлы итеп ремонтлап тороу ҙа шулай уҡ нефть бирешен арттырҙы. Атап әйткәндә 144-се номерлы скважина ремонттан һуң нефтте 30 процентҡа күберәк бирә башланы.

Скважиналарҙы парафиндән эшкәртеү саралары ла күп уңышлы башҡарыла. Хәҙер беренсе промыселдең участкалары һәм вахталары араһында штуцерҙарҙы әлгәлә тотоу өсөн ярыш йәйелдерелә. Был сара промысел буйынса көн һайын йөҙҙәрсә тонна өҫтәмә нефть алыуға мөмкинлек бирҙе.

Бөйөк Октябрь хөрмәтенә йәйелдерелгән социалистик ярыш алдынғыларҙың, стахановсыларҙың сафын өлөнә-әле күбәйтә бара. Мастер Надыршин, Кондрашов, Синявский иптәштәрҙең участкалары көн һайын заданиеләрҙе ун ике—ун дүрт процентҡа арттырып үтәйҙәр.

И. Болдогоев.

Байрам хөрмәтенә

Башптицепром системаһының алдынғы предприятиеләре ярты йыллыҡ программаны бер ай алда тамамланылар. Ә система буйынса биш айлыҡ план үтәлеше 102 процент тәшкил итә.

Мәскәү ҡалаһының алдынғы предприятиеләре коллективтәре мөрәжәғәтендә системаның работниктәре һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың өсөнсө йылы программаһын Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллығына үтәргә ҡарар иттеләр. Октябрь алды ярышында Туймазы, Бәләбәй, Шишмә ҡонсолоҡ комбинаттары һәм Кушнаренко контораһы коллективтәре алдынғы сафта баралар.

Башптицепром работниктәре үҙҙәренең производство пландарын үтәү буйынса Татптицепром системаһы менән ярыша.

А. Кучуков.

Тимер юлсылар һәм йылғасылар йөкләмәләрҙе үтәмәйҙәр

Өфө тимер юлсылары Ағиҙел йылға пароходстводың коллективе менән ағымдағы йылда йөк ташыу заданиеләрен уңышлы үтәү өсөн социалистик ярышҡа сыҡҡайнылар. Тимер юлсылар менән йылғасылар үҙҙәренең берлектә үткәрелгән кәңәшмәләрендә, уҙған йылдың һабаҡтарын иҫкә алып, быйыл тапшырылған эштәрҙе яҡшы сифатлы итеп башҡарыу өсөн күп кенә конкрет саралар билдәләгәйнеләр.

Ләкин тимер юлсылар ҙа, йылғасылар ҙа йөкләмәләрен үтәүҙә сиктән тыш насар эшләйҙәр. Май айында Өфө-I пристаненән вагондар оҙатыу планы үтәлмәне. Оҙатылған вагондарҙың нагрузкаһы ла етерлек түгел. Вагондар үҙ ваҡытында тейәлмәү арҡаһында 1.600 сәғәт простой яһалды. Июнь айында ла ошондай уҡ хәл ҡабатлана.

Был әҙәкләктең сәбәптәре — тимер юлсыларҙың план буйынса билдәләнгән составтарҙы бирел еткермәүҙәрендә, ә йылғасыларҙың тейәү эштәрен рациональ ойоштора алмауҙарында. Бына ошондай фактылар. Причалға һәр ике сәғәткә 3—4 вагон бирелеп торорға тейеш. Ә ғәмәлдә вагондар 6—7 сәғәт интервал менән биреләләр. Улар ҙа йыш ҡына талап ителгән причалға түгел, башҡа урындарға эләгәләр.

Мәҫәлән, күптән түгел, тимер юлсыларҙың үҙ бурыстарына яуапһыҙ ҡарауҙары арҡаһында вагондар 11-се причал урынына 5-се причалға ебәрелделәр.

Пристанда механизация тулыһынса файҙаланылмай. Тейәү буйынса техник нормалар үтәлмәй.

Д. Ситников.

Юлдар төҙөкләндерелә

Баҡалы районының колхозсылары һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙары юл төҙәү эштәрендә актив ҡатнашалар.

Хәҙер 200 метрға яҡын оҙонлоҡтағы ике күпергә капиталь ремонт үткәрелде. Күперҙәр ремонтлау өсөн 600 кубометрҙан артыҡ ағас, 110 кубометр таш, юлдар төҙөкләндереү өсөн 900 кубометр ҡырсын һәм ҡом ташылды. Баҡалы—Туймазы юлында ике ярым километр, Баҡалы—Өфө юлында 9 километр юлға капиталь ремонт үткәрелде.

Юлдарҙы төҙөкләндереүҙә һәр көн 800 кеше, 60 баш ат һәм автомашиналар ҡатнаша. «Гудок», «Ҡыҙыл шишмә», һәм «Молодежь» ауыл хужалығы артеле члендәре был эштә актив ҡатнашалар.

Өфө аккумулятор артеле стахановсыһы Зина Грознова биш йыллыҡ нормаһын 1 майға үтәп, 1951 йыл иҫәбенә эшләй.
Һүрәттә: Иптәш З. Грознова эш өҫтөндә.
А. Червинский фотоһы.

Старателдәр артеле биш йыллыҡ планды үтәне

УЧАЛЫ. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Учалы рудниғенең Ленин исемендәге старателдәр артеле (председателе иптәш Скворцов) ленинградлылар саҡырыуына ҡушылып, үҙенең биш йыллыҡ планын 1948 йылдың 1 июлена үтәргә йөкләмә алғайны. Коллектив һүҙендә торҙо. Старателдәр билдәләнгән сроктан алда, 10 июнгә уҡ үҙҙәренең биш йыллыҡ пландарын үтәнеләр.

Быға артель стахановсы хеҙмәт һәм социалистик ярыш һөҙөмтәһендә өлгәште. Артелдә хәҙер 360 стахановсы һәм 348 ударник иҫәпләнә.

Старателдәр биш йыллыҡ аҙағына тиклем тағы ла бер биш йыллыҡ план үтәргә йөкләмә алдылар.

Ремонтсыларҙың уңыштары

Бынан бер нисә айҙар элек Башметаллпромсоюз ремонт-төҙөлөш артеле ойошторғайны. Артель Өфө ҡалаһындағы промышленность предприятиеләренең, һәр төрлө ойошмаларының биналарына, шулай уҡ айырым граждандарҙың торлаҡтарына талап ителгән ремонт эштәрен башҡара. Был артель үҙенең ойошторолған көнөнән алып бирелгән планды 180 процентҡа үтәне. Пландан тыш ун биш объектҡа капиталь ремонт үткәрҙе.

Ремонтсылар Октябрь алды ярышына ҡушылып, үҙ өҫтәренә күп кенә конкрет йөкләмәләр алдылар.

Артель эргәһендә өҫтәлдәр, ултырғыстар эшләү мастерскойы ойошторола. Ул июнь аҙағында уҡ хеҙмәтсәндәрҙең заказдары буйынса продукциялар етештерә башлаясаҡ.

Р. Сафин.

Алдынғы мастерҙар йәш эшселәрҙе өйрәтәләр

Өфө штамплау заводында йәш кадрҙарҙы тәрбиәләү эше яҡшы ҡуйылған. Бында йәш эшселәрҙе техминимум түңәрәктәрендә өйрәтеү менән бер рәттән, уларҙы иң яҡшы мастерҙарға беркетеп, квалификацияларын күтәрәләр. Мастер Кулагин, Стожкин, Кузнецов иптәштәр һәр береһе [illegible] эшсене өйрәттеләр. Күп эшселәр наладчиктар, бригадирҙар, шулай уҡ агрегаттарҙа операторҙар булып эшләйҙәр.

Элекке йорт хужабикәһе Людмила Нелидова хәҙер беренсе цехта стахановсы штамповщицалар бригадаһы менән етәкселек итә. Ул үҙенең юғары хеҙмәт етештереүсәнлекле эшләүе һәм штамповщицаларҙы оҫта туплай белеүе менән заводта дан яулап алды. Маргарита Матвееваның заводҡа ингәндә бер төрлө лә һөнәре юҡ ине, а хәҙер яҡшы шлифовальщица булып иҫәпләнә. [illegible] Иптәштәр Л. Данилин, Виктор Иванов бер ярым-ике норма бирәләр. [illegible]

Ағымдағы йылдың июнь айында заводта өс стахановсы мәктәп асыласаҡ. Бында алдынғы мастерҙар һәм стахановсылар үҙ тәжрибәләре менән туранан-тура эш өҫтөндә уртаҡлашасаҡтар.

А. Сухов.

Специалист кәңәштәре

Көнбағыш сәсеүлектәрен яҡшы тәрбиәләргә

Көнбағыш — майлы культуралар араһында иң ҙур әһәмиәтле культура. Ул 25—30 процент тирәһе май бирә һәм уның урожайы юғары, рыжикка ҡарағанда 2—4 тапҡыр артыҡ була. [illegible] 10—15 килограмм май бирә. Бына шуның өсөн партия һәм хөкүмәт көнбағыштың сәсеү майҙанын киңәйтеүгә һәм уның урожайлылығын күтәреүгә айырыуса ныҡ иғтибар итәләр. СССР Верховный Советы Президиумының Указы буйынса быйыл көнбағыштан юғары урожай алыусыларға Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелә һәм алдынғыларҙы ордендар, медалдәр менән наградлаясаҡ.

Беҙҙең республикабыҙҙа көнбағыштан юғары урожай алыу өсөн бөтә шарттар бар. Уны яҡшы итеп сәскәндә һәм дөрөҫ тәрбиә саралары үткәргәндә, көнбағыш 30—35 центнер урожайҙы бик еңел бирә ала. [illegible] хәҙергә 8—10 центнерҙан да арта алмай әле. Уҙған йыл 2—3 центнер генә урожай алған район һәм колхоздар ҙа булды.

Көнбағыштан юғары урожай алыуҙа уны дөрөҫ һәм яҡшы итеп тәрбиәләү ҙур роль уйнай. [illegible] 18 центнер көнбағыш урожайы алынды. 10 көнгә һуңлап һирәкләтелгән ерҙән 14,5 центнер һәм 20 көнгә һуңлап һирәкләтелгән ерҙән 9,3 центнер генә урожай алынды. Утау һәм рәт араларын йомшартыу буйынса ла һөҙөмтәләр шундай уҡ.

[illegible]

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарында, көнбағыштың рәт араларын йомшартыу һәм утау кәмендә өс тапҡыр үткәрелергә тейеш, тип әйтелә. [illegible]

Рәт араларын беренсе тапҡыр йомшартыу һәм рәттәрҙә арҡыры итеп тырматыу көнбағыш шытып сығып [illegible] үткәрелә. [illegible] рәт араларын трактор культиваторҙары, ат планеткалары менән йомшартырға һәм һирәкләтергә кәрәк. Был эште ҡул планеткалары йәки мотыгалар менән дә үткәрергә мөмкин. Йомшартыу 6—8 сантиметрҙан да һай булырға тейеш түгел. Планеткалар, культиваторҙың табандары һәм мотыгалар үткер булырға тейеш.

[illegible] 35 сантиметр итеп, [illegible] 30 сантиметр итеп үткәрергә кәрәк. Рәт араларын беренсе тапҡыр йомшартыу 6—8 сантиметр, икенсе тапҡыр 8—10 сантиметр һәм өсөнсө тапҡыр 10—12 сантиметр тәрәнлектә үткәрелә.

[illegible]

Агроном В. Ғирфанов.

Утау ойошторолмай

Утаусылар баҫыуға һуң сығыулар, эш тарҡау башлана. Кем ҡайҙа теләһә, шул урында утарға тотона. Орлоксолоҡ участкаһына 9 кеше килгәйне. Уларҙың береһенә лә ер бүленеп бирелмәне. Көнлек нормалар ҙа үтәлмәне.

— Норма, күпме утаһа, шул тиклем, — ти звеновод Аплекаев.

Кариҙел районының Сталин исемендәге колхозында утау бына шулай бара. Бындай хәлде башҡа колхоздарҙа ла осратып була. «Знамя труда» колхозында утауға ни бары 10 кеше генә йөрөй. Улар ҙа тик 8—10 йәшлек үҫмерҙәр генә. Колхоз председателдәре һәм бригадирҙар сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу эшенә бәйләнмәйҙәр, бөтә колхозсыларҙы ла утауға ылыҡтырмайҙар.

Молотов исемендәге колхозда утауҙың сифатына иғтибар ителмәй. Ә колхоз председателе Ибраһимов:

— Ос көндә 181 гектар ашлыҡты ҡый үләндәренән таҙарттыҡ, —тип маҡтана. Уталды, тип иҫәпләнгән бөтә баҫыуҙарҙа ла ҡый үләндәре сәсеүлектәрҙе ҡаплаған.

Районда утауға бары тик 12 колхоз ғына төштө.

Ғ. И.

Колхоз председателе

Колхоз ауылында социалистик игенселекте ойоштороусыларҙың һәм етәкселәрҙең күп һанлы армияһы үҫте. Был кадрҙар беҙҙең ауылыбыҙҙың алтын фонды, социалистик ауыл хужалығының ҡиммәтле капиталы булып торалар. Уларҙың квалификацияһына государство пландарының уңышлы үтәлеүе, колхоздарҙың общественный хужалығының артабан үҫеүе һәм ныҡыуы бик ныҡ дәрәжәлә бәйләнгән.

Колхоз председателе — бөтә артель члендәренең ышанысына эйә булған кеше. Уға хәҙерге заман ауыл хужалығы техникаһына һәм алдынғы агрономия фәненә нигеҙләнгән бай һәм күп тармаҡлы хужалыҡ ышандырылған. Был хужалыҡҡа уңышлы етәкселек итеү өсөн государство интерестарен аныҡ рәүештә күҙ алдына килтерергә, партияның һәм хөкүмәттең директиваларын дөрөҫ тормошҡа ашырырға, колхоз тормошоноң төп законын — ауыл хужалығы артеленең Уставын теүәл үтәргә кәрәк.

Әгәр ҙә председатель был талаптарҙы һаҡлаһа, — ул колхозсылар араһында авторитетле була. Алдынғы колхоз ауылы вожактарының исемдәре бөтә ил буйынса билдәле була.

Мәҫәлән, Мәскәү өлкәһе, Дмитров районы, «Победа» колхозының председателе, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Егоровтың исемен күрһәтергә мөмкин. Уның тарафынан етәкселек ителгән ауыл хужалығы артеле колхоз производствоһының һәр яҡлы үҫеүе һәм юғары доход биреүе өлгөһө булып тора. Алтай крайы, Шикунов районы, Молотов исемендәге колхоз председателе, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Грибьконың исемен дә күрһәтергә мөмкин. Ул етәкселек иткән колхоз Алтайҙа алдынғы игенселәрҙең ғүзәл мәктәбе булып тора, новаторлыҡ һәм уйлап сығарыусанлыҡтың күп өлгөләрен күрһәтә. Бөтә кешенең почеты һәм хөрмәте менән урынлы рәүештә файҙаланған колхоз председателдәренең йөҙәрләгән исемдәрен күрһәтергә мөмкин.

Колхоз председателенә ҙур хоҡуҡтар бирелгән, күп бурыстар йөкмәтелгән. Ул артелдең һәм уның бригадаларының эшенә көндәлек етәкселек итеүҙе башҡара, артель правлениеһенең ҡарарҙары үтәлеүен тикшерә. Башҡаларҙан талап итеү менән бергә, председатель үҙе колхоз ҡөролошон артабан ныҡытыуҙа, хеҙмәт дисциплинаһын һәм колхозсыларҙың аңлылығын күтәреүҙә арымай-талмай көрәшсе булырға тейеш.

Колхозсыларҙың ҙур күпселеге колхоздарҙың общественный хужалығында намыҫлы рәүештә эшләйҙәр. Был кешеләр ауыл хужалығын күтәреү, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡтың план заданиеләрен үтәү өсөн бөтә көстәрен бирәләр. Малсылыҡтың доход биреүсәнлеген күтәреү өсөн яңы юлдар табалар, колхоздарҙың общественный хужалығын төрлө яҡлап үҫтереү өсөн резервтарҙы мобилизовать итәләр. Ауыл хужалығын күтәреү эше государство һәм колхоз ҡоролошоноң интерестарена бөтә йөрәктәре менән бирелгән миллионлаған хеҙмәтсәндәрҙең ышанысты ҡулдарында.

Ләкин ялҡау эшләүсе, үҙенең артелдә тороуын спекуляция һәм мал табыу өсөн файҙаланыусы колхозсыларҙың ҙур булмаған өлөшө бар әле. Паразитик көн күргән ошондай шәхси милкселекле һәм рвач элементтәр ҡайһы саҡта артелдә хеҙмәт дисциплинаһын тарҡаталар һәм шуның менән бөтә колхозға һәм намыҫлы колхозсыларға зыян килтерәләр. Колхоз председателе бындай кешеләргә килешеп ҡарамаҫҡа һәм колхоздарҙың общественный ерҙәрен һәм колхоз байлыҡтарын ныҡлы һаҡларға тейеш.

Колхоз председателенең эшендә иң мөһиме — хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу, артель члендәренең социалистик аңын күтәреү. Әгәр ҙә һүҙ ялҡауҙарға, хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларға, артель милкен урлаусыларға, туҙҙырыусыларға, колхозға алға китеү өсөн ҡомасаулы кешеләргә ҡаршы көрәш тураһында бара икән, председатель мәсьәләне ҡыйыу ҡуйыуҙан бер ҙә тартынырға тейеш түгел. Эште шулай ҡуйырға кәрәк, бөтә намыҫлы колхозсылар уларҙың колхоздарын кем артҡа тартҡанын, кемдәрҙең ғәйебе буйынса государство алдында ул бурыслы булып ҡалғанын, хеҙмәт көнөнә аҙ түләнеүен күрһендәр. Шул ваҡытта бөтә намыҫлы колхозсылар тупланған булырҙар, ялҡауҙарға, әрәм тамаҡтарға һәм общественный милкте туҙҙырыусыларға, урлаусыларға ҡаршы көрәштә ауыл хужалығы артеле Уставының һәм совет закондарын бөтә көсөн файҙалана аласаҡтар.

Колхоз председателдәре ялҡауҙарға, уҫал уй менән хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусыларға ҡаршы аяуһыҙ көрәшеп, бөтә намыҫлы колхозсыларҙың ярҙамында социалистик игенселектең яңы сискәләнеүе юлы буйынса тиҙерәк алға хәрәкәт итеү өсөн юлды таҙарталар. Бөтә общественный хужалыҡ тармаҡтарының үҫешен алға ебәреү, яңы төҙөлештәрҙе йәйелдереү, колхозсыларҙың үҙҙәренең материаль-культура кимәлен күтәреү өсөн колхоздарҙа бай мөмкинлектәр бар.

Ҡайһы бер колхоздар һаман да бер яҡлы ғына үҫәләр. Бындай колхоздарҙың етәкселәре эшсе ҡул көсөнөң етешмәүенә һылтанаалар, тиҫтәләрсә башҡа «объектив» сәбәптәрҙе килтереп ҡуялар. Асылда бындай колхоздарҙың бер яҡлы ғына үҫешенең сәбәбе уларҙың үҙҙәрендәге хеҙмәт резервтарын тулыһынса файҙаланмауҙарынан тора. Уларҙа эшсе көсөнөң байтаҡ өлөшө общественный эштә ҡатнашмай. Әгәр ҙә бөтә колхозсылар ҙа намыҫлы эшләһәләр, ул саҡта теләһә ниндәй артта ҡалыусы колхозда ла артель производствоһының бөтә тармаҡтарын үҫтереү һәм ныҡытыу өсөн көс табыласаҡ.

Күп кенә райондарҙа колхоз председателдәрен йыш алмаштырыуҙың яраҡһыҙ практикаһы бөтөрөлмәгән әле. Был йыш ҡына колхозсыларҙың теләктәре менән иҫәпләшмәйенсә эшләнә, ул общественный хужалыҡҡа серьез зарар яһай. Ҡайһы бер райондарҙың етәкселәренә СССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының «Колхоздарҙа ауыл хужалығы артеле Уставын боҙоуҙарҙы бөтөрөү саралары тураһындағы» ҡарарын тағы ла бер тапҡыр иҫтәренә төшөрөп китергә кәрәк. Был ҡарарҙа: «Партия райкомдарына, район Советтәренә һәм ер органдарына колхоз председателдәрен колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарынан тыш билдәләүҙе һәм урынынан алыуҙы ҡаты яуаплылыҡ аҫтында тыйырға», тип әйтелә.

Райондарҙың һәм колхоздарҙың партия органдары етәкселәре колхоз председателдәрен хужалыҡҡа большевистик етәкселек искусствоһына өйрәтергә, уларҙы ауыл хужалығы артеле Уставын ныҡ һаҡлау, колхоз демократияһына хөрмәт итеү рухында тәрбиәләргә тейештәр. Вожактар һәм ойоштороусылар булыу яғынан уларҙың квалификацияһын систематик рәүештә күтәреү — колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан артабан ныҡытыуҙың мөһим бурыстарының береһе.

Уҙған ҡыш бик күп өлкә, край һәм республикаларҙа колхоз председателдәренең теоретик белемдәрен күтәреү буйынса курстар ойошторолғайны. Ҡышҡы уҡыу—бик мөһим һәм кәрәкле эш. Ләкин уның менән генә сикләнергә ярамай. Уҡыу йәйге практик эштә лә, колхоз етәкселәре тарафынан ебәрелгән хаталарҙы тикшереү менән дә дауам итергә тейеш. Колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарын систематик рәүештә үткәрергә, унда хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу, айырым эш төрҙәре буйынса хеҙмәт көндәрен тотоноу планының үтәлеше тураһында мәсьәләләр ҡуйырға кәрәк. Яҡшы әҙерләнгән һәм яҡшы үткәрелгән йыйылыштар колхоздарҙы ойоштороу-хужалыҡ яғынан ныҡытыуға, колхозсыларҙың ижади инициативаларын үҫтереүгә ярҙам итәләр.

Колхоз председателдәренә бигерәк тә хәҙер, ураҡ һәм иген әҙерләү башланыу осоронда, ҙур ярҙам кәрәк. Ашлыҡ йыйнау эштәренең күләме быйыл уҙған йылға ҡарағанда байтаҡ ҙур. Урожай йыйнауҙы тиҙ һәм юғалтыуһыҙ үткәреү, Ватан алдындағы йөкләмәне тулыһынса һәм ваҡытында үтәү өсөн колхоздарҙың бөтә хеҙмәт резервтарын тупларға кәрәк.

(«Правда» газетаһының 1948 йыл 20 июндагы башмәҡәләһе).

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Готвальдтең армияға биргән приказы

ПРАГА, 18 июнь. (ТАСС). Чехословакия республикаһы президенте Клемент Готвальд армияға приказ бирҙе. Приказда былай тип әйтелә:

«Һалдаттар! Мин республиканың яңынан һайланған президенте булыуым менән, конституцияға ярашлы рәүештә, коралды көстәрҙең баш командующийы булам. Мин милли собраниега халык ирегә буйынса, халык һәм государство интерестәрендә үҙемдең бурыстарымды аңлы рәүештә һәм ныкышмалы, үтәрмен, — тип ант иттем. Азатлык һәм бойондороҡһоҙлоҡ халык өсөн иң ҙур ҡиммәтлелек булып тора. Был азатлыҡ һәм бойондороҡһоҙлоҡ һаҡланһын өсөн мин бөтә нәмәне эшләрмен.

Үткән тарихи осор шуны күрһәтте: элек республикаға етәкселек иткән буржуазия беҙҙең халктарыбыҙҙың азатлығын һәм бойондороҡһоҙлоғон һаҡларға һәләтле булманы. Идара итеүсе һатлык синыф Мюнхен ваҡыттарында беҙҙең ереләрҙе немец оккупанттарына бирҙе. Республика таланды һәм уның халкы колоккка төшөрелде һәм физик уктерелде. Бөгөн икенсе төрлә хал. 1945 йылдағы май революцияһынан һуң, һәм февралдә эске һәм тышкы реакцияны еңгәндән һуң һәм 1948 йылдың 30 майында данлы еңгәндән һуң теләһә нindәй яңы Мюнхендең булыуы мөмкин түгел. Буржуазия властән ситләтелде, власть хәҙер халк үҙ кулдарында нык тота. Беҙҙең эске һәм тышкы хәлебеҙ, касанда булһа булғандағынан, ныгырак. Республика халк демократик режиме менән һәм туғандаш Советтар Союзы һәм башка славян һәм халкдемократик государстволарының союздаш мөнәсәбәттәре менән тәьмин ителгән.

Беҙҙең Ватаныбыҙҙы уңышлы һаҡлауҙың төп гарантияһы шунда тора: беҙҙең көстәребеҙҙең нигеҙ сығанактары республикабыҙҙың бөтә халктары берҙәмлеге менән арттырылыуҙа. Февраль еңеүенән һуң республикабыҙҙың коралды көстәрен төҙөү яңы хәл иткес осорға инде. Беҙ бөтәнләй ышаныслы, халк-демократияһы режимена тулыһынса бирелгән, политик яктан өлгөргән, аңлы дисциплиналы, юғары хәрби оҫталыкка эйә булған һәм хәҙерге заман коралы һәм техник средстволары менән коралланған армияны төҙөргә ынтылырга тейешлебеҙ. Беҙ өҙлөксеҙ рәүештә камиллашергә һәм укырға, беҙҙең иң ҙур союзнигебеҙ — Совет Армияһының тәжрибәләрен кулланырға тейешбеҙ.

Беҙҙең бурысыбыҙ һәр сакта ла ваҡыттың талаптары менән һәм хәрби үҫештең прогрессе менән бер аҙымда барыу. Беҙҙең бурыстарыбыҙ: армияны азатлыктың, бойондороҡһоҙлоҡтоң һәм халкдемократияһы режимен нык һәм ышаныслы һакслы итеүҙән тора».

Америкалылар Урта диңгеҙҙең Төркиә яҙарында „стратегик зона" төҙөргә уйлайҙар

ПРАГА, 18 июнь. (ТАСС). Телепресс агентствоһының Берлиндән хәбәр итеүенә карағанда, Урта диңгеҙҙең Төркиә яҙары буйлап «стратегик зона» төҙөү генерал Клей һәм Төркиәнең генераль штабы начальнике генерал Омуртак һөйләшеүҙәренең темаһы булып торорға тейеш. Был масьәлә Франкфуртта Европа һәм Урта Көнсығыш өсөн булған хәрби разведка офицерҙәре һәм хәрби атташеләрҙең конференцияһында тикшерелгәйне. Генерал Омуртак һәм Төркиәнең генераль штабының 9 офицере, ике аҙналык визит менән, 20 июнда Германияның Америка зонаһына киләсәктәр. Улар Американың һәр төрлө һауа көстәре һәм коро ерҙәге хәрби частәренә барасактар. Һәм уларҙың хәрби снаряжениеләре, шулай ук хәрби әҙерлек методтары менән танышасактар.

Омуртактың барыуы генерал Клейға һәм уның штабына Американың Төркиәлә «стратегик зона» төҙөү планы тураһында каңашеүгә мөмкинлек бирәсәк. Был зона Америка-Төркиә командованне карамағында буласак. Урта диңгеҙҙең Төркиә яҙары буйлап төҙөлгән был зона, Американың круттары фекеренсә, әгәр Грециялағы хәлләр, улар өсөн насар якка кәсәйә башлаһа, бигерәк тә файҙалы буласак. Америка частәре, әгәр кәрәк булһа, Грециянан шунда күсереләсәктәр.

Американың Германиялағы хәрби запастарынан Төркиә снаряжение рәүешендә төрлө «ярҙам», бигерәк тә самолеттар алғас, тип хәбәр итә телепресс, генерал Клей Американың стратегик мохтажлығын Омуртакка еңел аңлатыр.

Германияның берҙәм социалистик партияһының немец халкына мөрәжәғәте

БЕРЛИН, 19 июнь. (ТАСС). Германияның берҙәм социалистик партияһы правленнеһе көнбайыш Германияла үткәрелеүсе сепаратный акса реформаһын гәйепләп, немец халкына мөрәжәғәт итте: «Көнбайыш державаларҙың был жарары немец халкы өсөн куркыныс удар булып тора. Ул Германияның бүлгеләү эшен тамамлауҙы күрһәтә».

«Сепаратный акса реформаһы, — тип әйтелә мөрәжәғәттә,—Потсдамда бирелгән вәғәҙәнән тулыһынса баш тартыуҙы белдерә. Ул вәғәҙәлә: экономик яктан берҙәм Германия менән эш итергә, тип әйтелгәйне.

Миллионлаган немецтәр халктан һорау үткәреү юлы менән берҙәм Германия төҙөү ягында торғанлыктарын белдергән моментта ошондай синтәнтыш антидемократик сара үткәрелде. Немец халкы сепаратный акса реформаһын үҙенең иркенә, общественный интерестәренә каршы юналдерелгән сара, тип карай.

«Сепаратный акса реформаһы бөтә экономик ҡыйынлыктарҙың көсәйеүен белдерә, сөнки Германияның барлык өлөштәре экономик яктан бер-береһе менән тығыҙ бәйләнгән. Был реформаның һөҙөмтәһе Германияның көнбайыш өлкәләрен Америка капиталның колонияһына әүерелдерәсәк».

Артабан мөрәжәғәттә былай тип әйтелә: «Бөтә Германия хужалығының йөрәге — Рур өлкәһе Германияны бүлеү юлы менән немец хужалығынан айырылып аласаҡ һәм Америка, Англия капиталы тарафынан эксплоатациялау объектына әйләнәсәк. Шулай итеп, Рур эшселәре икеләтә колоккка төшәсәктәр һәм көнбайыш Германия хеҙмәтсәндәре сепаратный акса реформаһы арҡаһында яңы ауырлыктар күрәсәктәр».

«Америка һәм Англияның эре капиталының вәкилдәре, — тип белдерә ГБСП (Германияның берҙәм социалистик партияһы) правленнеһе, — Германияны бүлгеләүҙе яклап тағы ла шуның өсөн сығыш яһайҙар, сөнки улар берҙәм Германияла хеҙмәтсәндәрҙең дөйөм көрәше һөҙөмтәһендә помещиктәр һәм монополистәр хакимлегенә сик куйылыр, тип куркалар. Англия һәм Американың эре капиталистәре сепаратный акса реформаһы үткәреү юлы менән көнбайыш Германияла элекке реакцион көстәрҙе ныгытып, үҙҙәренең политик позицияларын да ныгытырға һәм халк ирке менән иҫәпләшмәскә теләйҙәр.

Был ауыр сәғәттәрҙә, немец халкына каршы һәм антидемократик политика мәҡсәттарында үҙегеҙҙе файҙаланыуға рөхсәт итмәскә беҙ бөтә немец халкын саҡырабыҙ. Көнбайыш зоналарҙа айырым акса булыуға карамаҫтан, Германияның тыныслык һөйөүсе һәм прогрессив көстәре үҙҙәрен берҙәм итеп һиҙерҙәр һәм тарҡатыусыларға каршы гәҙел көрәш алып барырҙар».

Даниала королок

КОПЕНГАГЕН, 18 июнь. (ТАСС). Май айында һәм июнь айының башында ямғырҙар булмау сәбәпле, Даниала урожайҙың күренеше ҡырка насарланды. Ҡайһы бер өлкәләрҙә урожайҙың торошо, үҙгән йыл Даниала айырыуса королок булғандағы һымаҡ.

Бөртөклө ашлыктарҙың урожайын кәнәғәтләнерлек тип иҫәпләгәндә лә, бакса һәм техник культуралары һалак булган тиҙәр. Шулай ук, үләндәрҙең торошо артык насар хәлдә. Ҡайһы бер районлардә үләндәр тулыһы менән көйөп бөткәндәр. Шуның һөҙөмтәһендә, мал һуйыу урындарында малдар, башка йылдарҙағы был ваҡыттарҙа һуйырға килтерелгән малдар һанына карағанда, хәҙер байтакка арткан. Илдә һөттөң дөйөм күләме аҙайҙы.

Әгәр ҙә ошо көндәрҙә ямғырҙар булмаһа, урожайҙың хәле насар буласак, тип иҫәпләйҙәр.

Грецияла һуғыш хәрәкәттәре

БЕЛГРАД, 18 июнь. (ТАСС). Иркле Греция радиостанцияһы демократик армияның Көнбайыш Македониялағы операциялары тураһында хәбәр итә. 2 июнда демократик армияның частәре, каты һуғыштарҙан һуң, Литохоро калаһын алғандар. Дошман ғәскәрҙәре кала янындағы тауға йәшеренгән. Демократик армия частәре Литохорола бай трофея алдылар. 10 июнда демократик армияның артиллерияһы Вради калаһындағы дошман ғәскәрҙәренең нығытмаларына атты. 7 июнгә каршы төндә, демократик армияның Көнбайыш Македония штабына буйһонған частәре Като-Клине ауылына инделәр. Һәм унда ҙур аҙык склаттарын, 8 баш йөк йөрөтөү малдарын алдылар.

Демократик армияның емертеүсе отрядтәре бөтә илдә актив хәрәкәт итәләр.

Немецтәрҙең экономик комиссияһы Көнбайыш Германияла сепаратный акса реформаһы үткәреү тураһында

БЕРЛИН, 19 июнь. (ТАСС). Көнбайыш Германияла сепаратный акса реформаһы үткәреү айканлы немецтәрҙең экономик комиссияһы немец халкына мөрәжәғәт итте. Ул, үҙенең мөрәжәғәтендә, көнбайыш оккупацион властәрҙең демократияға каршы тарҡатыусылык эштәрен гәйепләй һәм Совет оккупацион зонаһындағы һәм Берлиндәге халктарҙы нормаль экономик тормошто дауам иттереүгә саҡыра.

Мөрәжәғәттә былай тип әйтелә: «Көнбайыш оккупацион державалар көнбайыш Германия өсөн сепаратный акса реформаһы үткәреү тураһында иғлан иттеләр. Был эш менән Германияның берҙәмлегенә удар яһалды һәм немец халкының экономик хәленә ҙур куркыныс тыуҙырылды.

Немец халкының интерестәре берҙәм акса реформаһы үткәреүҙе талап иттеләр, һәм Советтар Союзының оккупацион властәре ярҙамында, Германияның бөтә прогрессив көстәре, һуңғы минутка тиклем, шуга өлгәшеү өсөн тырыштылар. Немец халкына үлтергес һөҙөмтәләре килтереүсе сепаратный акса реформаһын уҙғарыуҙа яуаплылык, быға тиклем Германияның берҙәмлегенә һәм беҙҙең милләттең киләсәгенә, был ударҙы күптән әҙерләүсе һәм уны яһаусыларға төшә».

Шулай уҡ, мөрәжәғәттә, немецтәрҙең экономик комиссияһы хеҙмәтсәндәрҙең һәм хужалыктың интерестәрен һаклау өсөн үҙ ваҡытында тейешле сараларҙы күрәсәк, тип әйтелә.

Чехословакия президентенең амнистия тураһында приказы

ПРАГА, 19 июнь. (ТАСС). Чехословакияның телеграф агентствоһы хәбәр итеүенә карағанда, Чехословакияның президенте Готвальд, президентлеккә бер тауыштан һайланыуы айканлы, киң күләмдә амнистия үткәреү тураһында иғлан итте. Бөгөн Готвальдтең иғлан ителгән приказы, 18 июнгә тиклем яһаган енәйәттәре өсөн төрмәгә ултыртылган бөтә кешеләрҙең дә язаһын автоматик рәүештә бер йылға кыҫкарта. Бер йылдан аҙ срокка ултыртылган кешеләр язаларын үтәүҙән тулыһынса коткарылалар.

Был амнистия республиканы һаклауға карата булган законлдарға каршы енәйәт эшләүҙәре өсөн хөкөм ителеүселәрҙе, хәрби енәйәттәр өсөн хөкөм ителеүселәрҙе, коллаборационистәрҙе һәм башка шундай енәйәтселәрҙе коткармай. Ләкин бындай енәйәт эшләп хөкөм ителеүселәрҙе ғәфү итеү өсөн индивидуаль рәүештә, махсус ғаризалар биреү тәртибендә, юлларға мөмкинлек бирелә.

Әгәр сит илгә сығып киткән кешеләр Чехословакияға кайткан булһалар, йәки өс ай эсендә әйләнеп кайтһалар амнистия буйынса ғәфү ителәләр.

ИРАН ПРЕМЬЕРЕНЕҢ БЕЛДЕРЕҮЕ

НЬЮ-ЙОРК, 19 июнь. (ТАСС). Юнайтед пресс агентствоһының Тегерандағы хәбәрсеһенең белдереүенә карағанда, премьер-министр Хажир интервьюһында, йәнәһе, Американың хәрби советниктәре «Иран уларҙың хеҙмәттәренән файҙаланыу кәрәкмәгән һанаганга тиклем» Иранда каласактар, тип белдергән.

футбол

20 июнда футбол буйынса РСФСР беренселеге өсөн дүртенсе осрашыу булып үтте. Өфө динамосылары үҙ стадионында Чебаксары калаһының «Сталинец» командаһын кабул иттеләр. Уйын башынан аҙағына тиклем куҡаҡтар капкаһы эргәһендә барҙы һәм 3:0 иҫәбе менән динамосылар файҙаһына тамамланды.

Динамосылар якын көндәрҙә Казанга китәсәктәр. Унда улар РСФСР беренселеге өсөн 27 июндә Казан футболистәре менән осрашасактар.

* * *

Ошо көндәрҙә Черниковск машиналар төҙөү заводының стадионында футбол буйынса РСФСР беренселеге өсөн «Завод командаһы» (Черниковск), «Сталинец» (Чебаксары) спорт обществоларының командалары осраштылар. Уйын 4:1 иҫәбе менән черниковсылар файҙаһына тамамланды.

Йылҡысылыҡ үҫә

Гафури районы «Урожай» колхозының малсылык работниктәре йылкы малын үҫтереүҙең государство планын йыл һайын арттырып үтәп киләләр. Улар 1948 йылда 14 колон алып, государство планын 3 башка арттырып үтәнеләр.

Яхин Әбделғалим — аттарҙы тәрбиәләүҙә һәм йылкы малын үҫтереүҙә был колхоздың данлы мастере. Ул йыл һайын үҙенә беркетелгән 10 бейәнән 9 баш колон ала. Иптәш Яхин тәрбиәләгән аттар һәр ваҡыт таҙа һәм көр булалар.

— Беҙҙә хәҙер йылкы малдарының һаны, һуғышка тиклемге кимәлгә карағанда, 15 башка артып китте. Колхоз бынан ары районлдың транспорт яғынан артта калган колхозларына йыл һайын 10—15 баш эш аты һатып торасаҡ, — ти колхоз председателе коммунист иптәш Зәйнетдинов.

Япмалы 4 ырҙын төҙәлдө

Яңауыл районының «Красный удар» колхозында урожай йыйнауға һәр яклап әҙерлек алып барыла. Ашлык һуғыу эштәрен һауа торошонон теләһә нindәй шарттарында алып барыу өсөн 3 бригадала япмалы 4 ырҙын төҙәлдө.

Төҙөлөш эштәрен алып барыу өсөн 12 кешенән колхозсы иптәш Хәбибуллин етәкселегендә махсус бригада ойошторолдо. Ул үҙенә йөкмәтелгән бурысты яҡшы үтәп сыкты.

М. Фәтхов.

Баҫыуҙа сауҙа

Дүртөйлө районы Ҡыргизке ауыл Советенең сельпоһы бөтәһе 10 ауылды хеҙмәтләндерә. Магазиндәр иртәнге 6 сәғәттән киске 9 сәғәткә тиклем асык булалар. Һатыу эшен бындай тәртиптә ойоштороу колхозсыларға кәрәк булған тауарҙарҙы иртән эшкә киткәнсе йәки кис эштән кайткас һатып алырға мөмкинлек бирә.

Бынан тыш, баҫыуҙа куна ятып эшләгән колхозсыларҙы сәй, тоҙ, шәкәр, папирос, тәмәке һәм шырпы кеүек тауарҙар менән тәьмин итеү маҡсатында күсмә һатыу ойошторолдо. Сельпо күсмә һатыу арҡылы сәсеү осоронда колхозсыларға 10 мең һумлык мануфактура һатты.

Хәҙер ул бесән һәм урожай йыйнау осоронда колхозсыларҙы тағы ла культуралырак хеҙмәтләндереү өсөн әҙерләнә.

Х. Хәсәнов.

Йәш музыканттар

Яңы төҙөлгән йорттоң тәҙрәләренән музыка тауыштары яңғырап тора. Был—Черниковск калаһының музыкаль мәктәбе. Унда эшселәр һәм хеҙмәтсәндәрҙең балалары фортепиано, скрипка, виолончель һәм башка музыка коралдарында уйнарға өйрәнәләр.

Мәктәптә укыу йылы тамамланды. Бөтә 32 укыусының 24-е класты тик «5» билдәләрә менән тенә тамамланылар.

Укыу йылы тамамланыуға арналған концертта укыусылар Чайковский, Бетховин этюдтәрен һәм башка көйҙәрҙе ҙур оҫталык менән башкарҙылар.

Музыка мәктәбе бындай якшы һөҙөмтәгә музыка укытыусылары Н. Салова, П. Урманов, В. Федосеева, Р. Әхмәтова һәм башка иптәштәрҙең үҙ эштәрен һөйөп башкарыуҙары арҡаһында иреште.

Мәктәп киләһе укыу йылына 80 укыусы кабул итәсәк.

П. Рывкин.

Благовар районы «Һабансы» колхозында һабан туйынан бер күренеш.

Һүрәттә: Х. Кадиров (70 йәш) һәм И. Еникиев (70 йәш) ағайҙар көрәшәләр.

Г. Нуравин фотоһы.

Тимер Алюк

Һабан туйы

I.

Иайге, йомшаҡ, йылы ел акрын ғына иҫә. Ҡараҡусҡыл йәшел арыш баҫыуы бер туктауһыҙ тулкынлана, кайҙалыр аға төҫлө. Һирәк-мирәк кенә акһыл томаң күтәрелә, арыш һеркә осора.

Күрше колхоз йәштәре көр аттарға тейәлеп, ошо ҡуйы арыш баҫыуы уртаһынан үткән юл буйлап «Һабансы» колхозына хеҙмәт байрамына — һабан туйына баралар.

* * *

Байрамса кейенгән ирҙәр, катын-кыҙҙар, май сәскәһе кеүек, матур биҙәкле күлдәктәрҙә, еҫтәл тирәһенә яҡынайҙылар. Музыка тауыштары тынып калды. Һәркәй акланы йәнле сәскәләр букетенә төрөнгәндәй.

«Һабансы» колхозы председателе, ике орденле иптәш Зәйләлов докладты бик кыҫка, ләкин тәрән йөкмәткеле итеп һөйләне:

— Партиябыҙ, һөйөклө юлбашсыбыҙ иптәш Сталин сәсеү майҙандарын киңәйтергә, баҫыу эштәрен тик якшы сифатлы итеп кенә үткәрергә һәм малдарҙы үрсетергә саҡыра. Беҙ был талаптарҙы үтәү өсөн көрәштең беренсе осорон якшы тамамлап сыктык. Быйыл, үткән йылға карағанда, яҙғы сәсеүҙе ике аҙнаға элек тамамланык һәм 90 гектарға арттырып сәстек. Үткән йыл юғары урожай алған өсөн беҙҙең колхоздан 15 кеше хөкүмәтебеҙҙең юғары наградалары — ордендәр һәм медалдәр менән награҙландылар. Хәҙер беҙҙең бурыс баҫыуҙарҙа гөрләп ултырган ашлыктарҙы тәрбиәләп үҫтереү, юғалтыуһыҙ йыйнап алыу һәм хөкүмәт алдындағы бурыстарҙы районда беренсе булып тамамлау өсөн көрәштән тора.

Урман күкрәге «ура» һәм кул сабыуҙар тауыштарына күмелде. Баҫыу стахановсыларын бүләкләүҙәр башлана. Яҙғы сәсеүҙә алдынғылык күрһәткән икенсе бригада — Хәмит Байков бригадаһына колхоздың күсмә Ҡыҙыл Байрағы тапшырыла. Бөтәһе 20-нән ашыу кеше киммәтле бүләктәр менән бүләкләнә.

II.

Һабан туй уйындары башлана.

Ҡиммәтле ебәк бөртектәрен елберҙәп торған ҡуйы, аҡ һ... лы, түңәрәк йөҙлө Ғәләүетдин ... кеүек карт Хәсәнде сак... Улар, йәштәр кеүек, ҙур ... нән көрәшәләр, оҫта алыш... Икенсе парҙа элекке фронт... Исонов менән Якуп карт ... шә. Көрәшселәрҙең һаны 30 ... нән артып китте.

Тамашасылар уларҙың көрәш... үен ҙур иғтибар менән күҙәтә... Карттар алыша башлаган һаб... кул сабалар.

— Карт булһалар ҙа, йәрәт... йәш беҙҙең бабайҙарҙың! — ... аранан берәү.

* * *

— Аттар китә! — тип кыс... ҙы «Һабансы» колхозының й... кысылык фермаһы мөдире ипт... Байков.

— «Дикарь» кайҙа?

— Буденный исемендәге к... хоздан «Венок» килгәнме әле?

Һыу һөлөгә кеүек түңәрәк, ... меҙ аттар стартка табан юл то... лар. Кешеләр телендә бер ... һорау:

— Кайһыһы уҙыр?

— Һәй, «Дикарь» уҙҙырма... һуң, ул бит үткән йылдарҙа бе... лә лә беренселекте алды!

— Киләләр!

— «Венок» алдан килә!

Кешеләрҙә тынһеҙ кисереш. ... геҙ килгән аттарға һәр кем ... сөн, үҙ энергияһын өҫтәрге теле...

— «Дикарь» ташланы!

Аттарҙы каршы алырға бар... тисҭәләрсә кешеләр «Дикарь... муйынынан косаҡланылар, һ... нан һөйҙөләр.

— Батырга дан!

Төрлө уйындар, күңел ... кискә тиклем дауам итте.

Благовар районы, «Һабан... сы» колхозы.

Китап укыусылар беҙгә яҙалар

БЕҘҘЕҢ БЫУЫН ТАУЫШЫ

Беҙ, әҙәби әҫәрҙәр укыусылар, йәш шағир Ғилемдар Рамазановтың «Беҙҙең быуын» исемле шиғырҙар йыйынтығын алдык. Китапка карата үҙебеҙҙең фекерҙәребеҙҙе әйтеп үтеүҙе урынлы һанайбыҙ.

Ғ. Рамазановтың шиғырҙары — тәрән патриотик тойғолар менән һуғарылған, эстәлекле булыу менән бергә, художестволы эшләнеш яғынан да байтак юғары торалар. Автор үҙе — Бөйөк Ватан һуғышында катнашыусы, һалдат һулышын тыңлаған, ҙур ауырлыктар кисергән кеше. Шуға күрә, уның уйҙары, тойғолары бөтә совет воиндәренә якын, уртак һәм аңлайышлы тойғолар.

Бына шағир «Еңеүселәр эшелоны» менән Тыуған илгә кайта:

«Европаны буйлап поезд үтә,
Иәйге елдәй, етеҙ талпынып,
Юл буйында дуҫтар күҙе көтә
Батырҙарын совет халкының.
. . . Күп рәсемдәр беҙҙең
вагондарҙа,
Тик берәүе бигерәк киммәтле:
Даһи рәсме паровозда, алда, —
Иң түрендә килә йөрәктең!»

Йыйынтыкка ингән «Тауышым уға минең», «Һынтыҙыу» шиғырҙарын да авторҙың иң якшы әҫәрҙәренән һанап була. Улар — тәрән идеялы, саф тойғоло, матур образдар менән поэтик дөйөмләштерелгән шиғырҙар.

Ғ. Рамазановтың был йыйынтығына ингән уңышлы шиғырҙары менән бер рәттән, билдәле, кайһы бер етешһеҙлектәре лә бар. Шуны ла әйтергә кәрәк, йыйынтыкка тыныс төҙөлөш темаларына яҙылған шиғырҙар аҙ ингән. Кайһы бер шиғырҙарҙа дәрәҫлекте боҙоп, еңел генә уйланған номаларҙы ... йөмләштереү, фекер буталсык... ры тыуҙырыу фактылары ла бар.

«Шиғыр» исемле шиғырҙа автор кеше йөрәгендә шиғыр ты... ҙырырлык көс сығанағын ... тәбиғәттең гүзәл күренештәрен... генә икәнлеген раҫлай. Әйтерһ... тик тәбиғәт һәм кыҙҙар йылм... уы ғына шағир йөрәгендә ш... илһамлылык тыуҙыра...

«Иә һайраһа талда таң ... Иә сәскәгә кунһа бал корт... Иәки боҙҙар китһә Иҙелдә ... Шул сак шиғыр килә күң...

Беҙҙенсә, совет шағирын ... кынландырыусы төп көс — ... вет ысынбарлығы, социал... төҙөлөштәр, тарихи подз... еңеүсе халк һәм уны ҙур аҙым... менән коммунизмга алып бар... коммунистәр партияһы, ә ... раль тәбиғәт кенә түгел.

Шулай ук, кайһы бер ши... ҙарҙа башкорт әҙәби теле ... ҙар ҙа бар: «һанаһым... Кар... калган икән», тубыкландык ... нына—теҙләндек, нинә урын... ник, буран олаһа — буран ... урынына һәм башкалар. Ш... ук поэтик уңышһыҙ строфа... йыш осрайҙар.

Дөйөм алғанда, йәш шағир... беренсе йыйынтығы — ук... аҙым. Уның күп шиғырҙары ... дан да беҙҙең быуындың т... булып яңғырайҙар. Шағирҙ... ғы ла, үҙ өҫтөндә ныкышмалы ... лап, етешһеҙлектәрҙе бет... үҫәсәгенә ҙур өмөт бар.

Ғали Шәрип...
Матрай районы

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ

Редакция адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00793. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 1690

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 124
23
июнь
шаршамбы

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ.

Башҡортостан партия ойошмаһының яҡындағы бурыстары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре иптәш С. Ә. Ваһаповтың ВКП(б) Өлкә Комитеты пленумында 18 июнда һөйләгән телмәре. (1—2-се биттәр).

Государство сиге тураһында СССР Хөкүмәте менән Финляндия республикаһы хөкүмәте араһында конвенция төҙөү. (2-се бит).

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүсе Мәләүез районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының бөтә төҙөүсе колхозсыларға һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарға мөрәжәғәте. (2-се бит).

Ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш — юғары урожай өсөн көрәш. (2-се бит).

Һәр бер колхоз буйынса пар һөрөү планын тулыһынса үтәргә! (3-сө бит).

А. Абдуллин. — ФЗО мәктәптәренә һәм һөнәрселек училищеларына призывты ойошҡан рәүештә үткәргә. (3-сө бит).

В. Морев. — АҠШ-та президент һайлауға ҡарата. (3—4-се биттәр).

Германиялағы Совет хәрби администрацияһының немец халҡына мөрәжәғәте. (4-се бит).

Бесән сабыуҙы һәм силос һалыуҙы яҡшы ойоштороорға

— Колхоз фермаларында мал һанын 1947 йылға ҡарағанда: мөгеҙле эре малдарҙы 23,2 процентҡа, һарыҡ һәм кәзәләрҙе 32,1 процентҡа, сусҡаларҙы 106 процентҡа, аттарҙы 15 процентҡа һәм ҡоштарҙы 178 процентҡа арттырырға, — Башҡортостан колхозсылары, малсылыҡ работниктәре бөйөк юлбашсыбыҙ һәм учителебеҙ иптәш Сталинға яҙған хатта бына ошондай йөкләмәләр алдылар.

Был яуаплы һәм почетлы йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәштә яҡшы уҡ уңыштарға өлгәшелде инде. Республикабыҙҙың йөҙәрләгән колхоздары малсылыҡты үҫтереүҙең планын үтәнеләр һәм тағы ла ҙурыраҡ еңеүҙәр яулап алыу маҡсатында тырышып эшләйҙәр. Шуның менән бергә, артта ҡалыусы колхоздар ҙа, районлар ҙа күп. Күгәрсен, Мәләүез, Бишбүләк, Миәкә райондары йылдан-йыл, кварталдан-кварталға малсылыҡ үҫтереү планын үтәмәй киләләр, малдарҙың үлеүенә һәм әрәм-шәрәм булыуына юл ҡуялар һәм яҡшы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн тейешле саралар күрмәйҙәр.

Общественный малсылыҡты артабан күтәреүҙә һәм уның продуктивлеген арттырыуҙа ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу — төп шарт. Ҡайҙа һутлы һәм ҡаты аҙыҡтар мул әҙерләнә һәм дөрөҫ файҙаланыла, унда малдар яҡшы ҡышлайҙар, көр булалар, продукт биреүсәнлеген кәметмәйҙәр һәм йәш малдар алыу проценте лә юғары була. Миҫал өсөн Әлшәй районының «Ленинская победа» колхозын алайыҡ. Бында бер генә баш малдың да юғалыуына юл ҡуйылмай, бөтә төр малдар буйынса план үтәлә. Ҡыш көнө һыйырҙар һөт биреүҙе кәметмәнеләр. Артабан да малсылыҡты уңышлы үҫтереү өсөн ферма яны участкаһында тамыр аҙыҡ сәсеү планы арттырып үтәлде. Хәҙер малдар өсөн аҙыҡ әҙерләү эштәре ҡыҙыу бара. Алдан әҙерләнгән ямдарға силос һалына. 800 гектар майҙанда бесән сабыласаҡ. 110 гектар күп йыллыҡ үләндәр сабылып, йыйналып алынды һәм эскерттәргә һалынды. 283 гектар люцерна һәм костер үләндәре быйыл ике тапҡыр сабылып алынасаҡ.

Башҡа алдынғы колхоздар ҙа малдарҙы яҡшы сифатлы аҙыҡ менән тәьмин итеүҙә уңышлы эшләйҙәр. Ҡыйғы районының Фрунзе исемендәге колхозында 140 тонна силос әҙерләү планы үтәлеү алдында тора. Абзан районының «Көрәш», Каганович, Стаханов, Мичурин, Максим Горький исемендәге колхоздарында ла бесән сабыу ойошҡан рәүештә башланды. Башҡа райондарҙа ла күп кенә колхоздар үләнде һайлап сабыуға төштеләр.

Тағы ла бер нисә көндән республикабыҙҙа массовый рәүештә бесән сабыу һәм йыйнау эштәре йәйелдереләсәк. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әле күп кенә райондарҙа был бик мөһим һәм яуаплы кампанияға тиҙ, ойошҡанлыҡ менән үткәреүгә әҙерлек сиктән тыш насар бара. 50-шәр бесән сапҡыс ремонтларға тейеш булған Бәләбәй, Воскресен районларында был эш бөтөнләй башланмаған. 13 мең гектарҙан артыҡ майҙанда бесән сабырға тейешле Йомағужа районында 137 бесән сапҡыстың береһе лә ремонтланмаған. Бесән сабыу майҙандары шулай уҡ ҙур булған Мәсетле, Зианчура, Күгәрсен, Ауырғазы райондарында ла бесән сабыу һәм йыйнау машиналарының ни бары 20—30 проценте генә әҙер.

Бындай хәл менән һис килешергә мөмкин түгел. Колхоздарҙан, ауыл хужалығы органдарынан бесән сабыу һәм йыйнау машиналарын һис кисекмәҫтән ремонтлауҙы ойоштороу һәм уларҙың бөтәһен дә массовый рәүештә эш башланғанға тиклем стройға индереү талап ителә. Бер генә бесән сапҡыс та, тырма ла ремонтланмайынса һәм эштә файҙаланылмайынса ҡалырға тейеш түгел.

Мал аҙығы әҙерләү кеүек ҙур эштең уңышын бер бесән сапҡыстар менән генә хәл итеп булмаясаҡ, әлбиттә. Бында ҡул салғыларын да бик ныҡ файҙаланырға кәрәк. Һәр бер хужалыҡта бесән сабыу һәм йыйнау планының үтәлешен үҙ ваҡытында тәьмин итерлек һанда кешеләр бүленергә тейеш. Уларҙың бөтәһен дә салғылар һәм башҡа кәрәкле нәмәләр менән тәьмин итергә кәрәк. Ҡайһы бер райондар был эшкә иғтибарһыҙ ҡарайҙар. Белорет районы наряд буйынса бүленгән 800 салғыны әле булһа алмаған һәм колхоздарға бирмәгән.

Бесән сабыу һәм йыйнау эше — ҡыҫҡа кампания. Яҡшы сифатлы аҙыҡ әҙерләү өсөн үләнде сәскә атҡан ваҡытында сабырға кәрәк. Һуңға ҡалһан—үлән сифатын юғалта, туҡлыҡлы булмай. Бына шуның өсөн дә тотош массивтарҙың өлгөрөүен көтөп торорға ярамай, һәр бер өлгөргән участканы сабырға, уны шунда уҡ йыйнап, кәбәндәргә һәм эскерттәргә һала барырға кәрәк. Шулай эшләмәгәндә, был эш бик оҙаҡҡа һуҙыласаҡ һәм урожай йыйнауҙы ваҡытында ойоштороуға ҡомасаулыҡ итәсәк. Мал аҙығы әҙерләү планын урожай йыйнауға башлағансы үтәү һәм арттырып үтәү — һәр бер колхоздың изге бурысы.

Хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороу бесән сабыуҙың уңышын хәл итеүҙә бик ҙур роль уйнай. Бында индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаны бөтә тулылығында ҡулланып була. Ваҡытлы рәүештә болонлоҡтарҙы бригадаларға беркетергә һәм ундағы бөтә үләндәрҙең үҙ ваҡытында сабылыуын һәм йыйналыуын тәьмин итергә кәрәк. Партиябыҙ һәм хөкүмәтебеҙ бесән йыйнауҙы уңышлы үткәреү маҡсатында бесән сапҡыстарҙа эшләүселәрҙе, салғысыларҙы дәртләндереү сараһын киң ҡулланыуҙы тәҡдим итәләр. Мәҫәлән, бесән сапҡыс менән 40 гектар майҙандың үләнен сабыу планын урожай йыйнауға төшөүгә тиклем үтәгән колхозсыға, пландан тыш сабылған һәр бер гектар өсөн 20-шәр килограмм бесән бирелергә тейеш. Бесән сабыуҙа ҡатнашҡан бөтә колхозсылар хеҙмәт көнөнә тейгәндән тыш үҙҙәре йыйнап һәм эскерткә һалған бесәндең унлап бер өлөшөн алырға хаҡлылар. Был турала һис кисекмәҫтән бөтә колхозсыларға аңлатырға һәм бесән сабыуҙа, йыйнауҙа хеҙмәт етештереүсәнлеген ҡырҡа күтәреүгә өлгәшергә кәрәк.

Силослау эшен дә ҡырҡа көсәйтеү талап ителә. Мал аҙығының был ҡиммәтле төрөн әҙерләү планының кәмендә 75 проценте урожай йыйнауға төшөүгә тиклем үтәлергә тейеш. Хәҙер әҙер ямдарҙың бөтәһен дә таҙартырға, ремонтларға, яңыларҙы төҙөргә һәм уларҙы үлән массалары менән тултырырға кәрәк.

Общественный малдарҙы ныҡлы аҙыҡ базаһы менән тәьмин итеү— государство әһәмиәтендәге ҙур эш. Уны уңышлы үткәреү өсөн партия, совет ойошмалары, ауыл хужалығы органдары бөтә колхозсыларҙы берҙәм эшкә туплағра бурыслылар. Яҡшы сифатлы, мул аҙыҡ булдырыу — малсылыҡты үҫтереүҙә алға ҙур аҙым яһау, Тыуған илебеҙгә, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрҙе үтәү өсөн ышаныслы шарттар тыуҙырыу тигән һүҙ.

Тауарҙарҙың мотлаҡ талап ителгән ассортименты

РСФСР сауҙа Министерствоһы культура, галантерея тауарҙары һәм төҙөү материалдары менән сауҙа итеүсе магазиндарға мотлаҡ талап ителгән тауар ассортиментының минимумын билдәләне. Роскульторг магазиндары үҙҙәрендә мәктәп һәм 38 төрлө канцелярия кәрәк-яраҡтарын, музыка ҡоралдарын, фото, радио һәм спорт тауарҙарын булдырырға тейештәр. Галантерея магазиндары барлығы йөҙгә яҡын исемдәге тауар ассортиментын булдырырға тейештәр.

Росметизстройторг магазиндары үҙҙәрендә ҡаҙаҡ, мейес өсөн кәрәкле әйберҙәр, һауыт-һабалар, ырғаҡтар, цемент, аҡбур, алебастр, эзбиз, күкташ һәм башҡа төрлө төҙөү материалдары булдырырға тейештәр.

(ТАСС).

Башҡортостан партия ойошмаһының яҡындағы бурыстары тураһында

*ВКП(б) Өлкә Комитеты секретаре иптәш С. Ә. Ваһаповтың ВКП(б) Өлкә Комитеты пленумында 18 июнда һөйләгән телмәре**

Иптәштәр!

Ағымдағы йылда республикабыҙҙың ауыл хужалығы, ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумының тарихи ҡарары менән билдәләнгән юл буйынса, үҙенең артабан күтәрелешендә тағы ла бер аҙым алға атланы. Республикабыҙ колхозларына һәм совхозларына Совет Хөкүмәтенең һәм лично иптәш Сталиндың даими рәүештә һәм үҫә барған ярҙамы арҡаһында, ауыл хужалығы хеҙмәтсәндәре, партияның өлкә ойошмаһы етәкселегендә, 1948 йылдың яҙғы сәсеүен ҡәнәғәтләнерлек үткәрҙеләр.

Һауа шарттарының үҙенсәлеге һәм яҙҙың һуңлап килеүе сәбәпле беҙ яҙғы сәсеүҙе, үткән йылға ҡарағанда, һуңлап һәм унан элекке йылдарға ҡарағанда, күп һуңлап башланыҡ.

Яҙғы ауыл хужалығы эштәренең һуңлап һайылдерелеүе беҙҙән уларҙы бик ныҡ күтәренке темптар менән алып барыуҙы талап итте һәм, әйтергә кәрәк, был бурысты беҙ нигеҙҙә үтәп сыҡтыҡ. Быны өсөн беҙгә бөтә кәрәкле шарттар тыуҙырылғайны. Үткән йыл республикабыҙ 800 яңы, ҡеүәтле трактор алғайны. Совет Хөкүмәте быйыл яҙ Башҡортостан МТС-тары һәм совхоздары өсөн тағы ла 760 трактор бүлде, колхоздарға етерлек күләмдә орлоҡ ссудаһы, иң ҡиммәтле аҙыҡ культураһы — бойҙай бирҙе.

Дүрт йөҙ мендән артыҡ гектар тунға һөрөлгән ерҙең булыуы яҙғы сәсеү темпын күтәреүгә шулай уҡ уңайлы шарттар тыуҙырҙы.

Ләкин, сәсеү майҙандарының байтаҡ киңәйеүе сәбәпле яҙ һөрөләсәк майҙаныбыҙҙың күләме ҙур булды. Шуның арҡаһында йәнле тартыу көстәренә лә, шулай уҡ трактор паркына ла нагрузка, үткән йылдарға ҡарағанда, байтаҡ юғарыраҡ булды.

Яҙғы баҫыу эштәрен үткәреүҙә темптың ҡәнәғәтләнерлек булыуы ошондай хәл менән дә аңлатыла: беҙ сәсеүҙе ойошҡаныраҡ үткәрҙек һәм колхозсыларҙың, совхоз эшселәренең һәм ауыл хужалығы специалистарының ҙур күңелләге. Тыуған ил алдында үҙҙәренең бурыстарын ныҡ аңлап, фидакәр эшләне.

Яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә республикабыҙ ауыл хужалығы работниктәренең иптәш Сталин алдында алған социалистик йөкләмәләре ҡабат ҙур роль уйнаныдар. Был йөкләмәләр буйынса яҙғы сәсеүҙә өлкә партия ойошмаһының бөтә массовый-политик һәм ойоштороусанлыҡ эше йәйелдерелде.

Яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙең һығай йомғаҡтары нәмәнән торалар һуң? Ҡыҫҡаса әйткәндә, улар шунан торалар: беренсенән, беҙ сәсеүҙе нигеҙҙә, үткән йылға ҡарағанда, яҡшыраҡ агротехник срокдарҙа һәм баҫыу эштәрен яҡшыраҡ сифатлы итеп үткәрҙек һәм, икенсенән, беҙ сәсеү майҙандарының структураһын бөртөклө ашлыҡ культуралар иҫәбенә ныҡ ҡына яҡшырттыҡ. Шуны әйтеү ҙә етә, республикабыҙҙа бойҙай майҙаны, үткән йыл менән сағыштырғанда, ике тапҡырға тип әйтерлек артты, ә арыш һәм бойҙай сәсеүлектәре, икеһен бергә алғанда, бөртөклө ашлыҡ культуралары дөйөм майҙанының 70 процент самаһын тәшкил итәләр.

Шик юҡ, республикала күп кенә райондарҙың артта ҡалыуҙарын бөтөрә алған булһаҡ, яҙғы сәсеүҙә беҙҙең уңыштарыбыҙ тағы ла ҙурыраҡ булыр ине. Яҙғы сәсеүҙең дөйөм йомғаҡтары, бигерәк тә, Архангель, Воскресен, Йәрмәкәй, Зианчура, Илеш, Күгәрсен, Көйөргәҙе, Мәләүез, Йомағужа һәм башҡа ҡайһы бер райондар иҫәбенә насарыраҡ булды. Воскресен һәм Зианчура райондары пландарҙы үтәнеләр, ләкин улар сәсеүҙе сиктән тыш оҙаҡҡа һуҙҙылар.

Әгәр ҙә яҙғы сәсеүҙә был райондарҙың артта ҡалыу сәбәптәрен эҙләп ҡараһаң, яҙғы ауыл хужалығы эштәренең һуҙылыуын һәм яҙғы сәсеү планының үтәлмәүен бик аҙ ғына дәрәжәлә аҡларлыҡ ниндәй ҙә булһа специфик сәбәптәрҙе, йәки еңеп сығып булмаҫлыҡ айырым ҡыйынлыҡтарҙы табып булмай. ВКП(б) Өлкә Комитетына, мәҫәлән, Илеш, Көйөргәҙе, Йәрмәкәй райондарында орлоҡ мәсьәләһендә ҡыйынлыҡтарҙың булыуы билдәле. Был район етәкселәре тарафынан планға государственный мөнәсәбәт булһа, улар күберәк сәскән булырҙар ине.

Һис тә хаталанмайынса әйтергә мөмкин, юғарыла күрһәтелгән райондарҙың артта ҡалыуҙары, башлыса, партия райкомдары һәм район Советтәре тарафынан яҙғы сәсеүгә етәкселек итеүҙәге етешһеҙлектәргә, Тыуған илебеҙ һәм иптәш Сталин алдында алған социалистик йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәшкә колхозсыларҙы насар ойоштороуға бәйләнгән.

Бөгөн партияның Өлкә Комитеты пленумында айырым райондарҙың сәсеүҙә насар эшләүҙәрен күрһәтеү һәм уларҙың етәкселәрен тәнҡитләү менән генә сикләнеү дөрөҫ булмаҫ ине. Беҙҙең бурыс шунан тора: был райондарҙа һәм шулай уҡ республиканың бөтә райондарында ла сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләп һәм урожай йыйнау эштәрен яҡшы үткәреп, был райондарҙа сәсеүҙең һуҙылыуын һәм яҙғы сәсеү планының үтәлмәүен юғары урожай алыу менән компенсировать итергә тейешбеҙ.

Онотторға ярамай, юғары урожай өсөн көрәштә яҙғы сәсеү мөһим этап, ләкин ул беренсе этап ҡына булып тора, иң мөһиме әле алда. Беҙҙең алда мөһим эштәрҙең береһе — сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү. Бесән сабыу ваҡыты килеп етте; малсылыҡты артабан күтәреү, уны ойошҡанлыҡ менән үткәреүгә бәйләнгән. Һәм, аҙаҡ килеп, алда — урожай йыйнау, арыш сәсеү һәм иген әҙерләү эштәре тора.

Иптәш Сталинға яҙған хатта беҙ ауыл хужалығы эштәренең бөтәһен дә уңышлы үткәрергә, партия һәм Совет Тыуған иле алдында иген әҙерләүҙе срогынан алда үтәргә йөкләмә алдыҡ. Был социалистик йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн бөтә ауыл хужалығы эшсәндәренең көсөркәнешле эшләүҙәре һәм партия аппаратының бөтә звеноларында һәм тотош өлкә партия ойошмаһында ойоштороу эштәре кимәленең юғары булыуы талап ителә.

Беҙ колхоздарыбыҙҙа һәм совхоздарыбыҙҙа булған бөтә резервтарҙы һәр ваҡыт эҙләргә, табырға һәм ауыл хужалығын күтәреү өсөн файҙаланырға тейешбеҙ. Улар ниндәй резервтар һәм уларҙы ҡайҙан эҙләргә кәрәк?

Миҫалға тракторҙар паркын файҙаланыуҙы алығыҙ. 10 июнгә тиклем республика буйынса 15 ат көслө һәр тракторға, йомшаҡ ер һөрөүгә әйләндереп иҫәплағанда, уртаса 151,2 гектар ер эшкәртелгән. Был республика буйынса уртаса һан, ә Архангель МТС-ында бер тракторға бөтәһе ни бары 72 гектар, Йылайыр МТС-ында — 48, Мрәсем МТС-ында — 98, Ерекле МТС-ында — 101, Сәрмән МТС-ында бөтәһе 26 гектар ғына. Подлуб МТС-ы тракторҙар эше планын 85 процентҡа, Хоҙайбирҙин МТС-ы 82 процентҡа, Мрәсем МТС-ы 80 процентҡа генә үтәне.

Бер үк шарттарҙа эшләгән төрлө МТС-тар береһе икенсеһенән бик айырмалыҡлы күрһәткестәр бирәләр. Мәҫәлән, Мишкә МТС-ы бер тракторға 122 гектар, ә шул уҡ районлың Сурай МТС-ы — 84 гектар эшкәртте. Был ике МТС та тракторҙар эше планын үтәмәне. Бәләбәй МТС-ы бер тракторға 178 гектар, ә Усень-Ивановка МТС-ы —123 гектар, Байғужа МТС-ы 252 гектар, ә Ямады МТС-ы 150 гектар ер эшкәртте.

Шартлы һәр тракторға сменала уртаса эшләп сығарыу нормала билдәләнгән 3,4 гектар урынына, 1,8 гектар тәшкил итә. Әгәр ҙә һәр бер тракторист тик нормаһы үтәһә, ул саҡта яҙғы ауыл хужалығы эштәрен үткәреүҙең темпы ике тапҡырға юғары булған булыр ине. Охлебинин, Ҡарламан һәм башҡа ҡайһы бер МТС-тар сәсеүҙе үткәреү өсөн планда билдәләнгәнгә ҡарағанда, ваҡытты ике тапҡырҙан да күберәк алдылар.

Артта ҡалыусы МТС-тарҙы уртаса МТС-тар кимәленә генә булһа ла күтәреү өсөн беҙгә нимәләр ҡомасаулайҙар? Быныҡ өсөн һис бер төрлө сәбәптәр юҡ. Айырым МТС-тарҙың артта ҡалыуының төп сәбәбе — трактористәрҙә һәм етәкселәрҙә тора. Быҡа әгәр ҙә бөтәһе лә тапшырылған эшкә ысынлап тотонһалар, ул саҡта тракторҙар аҙыраҡ тик торорҙар ине. Бөтә тракторҙар паркы эшен яҡшыртыу өсөн беҙ һәр бер МТС, һәр бер тракторист тарафынан пландың үтәлеүенә өлгәшергә бурыслыбыҙ. Быға өлгәшеү артыҡ ауыр түгел, сөнки күпселек МТС-тар һәм трактор бригадалары государство заданиеларын хәҙерҙән үк байтаҡ арттырып үтәп киләләр. Шулай, мәҫәлән, Әбдрәзәҡ МТС-ы яҙғы сәсеү планын 189 процентҡа, Дәүләкән МТС-ы 158 процентҡа, Иглин МТС-ы 151 процентҡа, Байғужа МТС-ы — 162 процентҡа үтәне, ә тотош республика буйынса яҙғы сәсеү осоронда тракторҙар эше планы, йомшаҡ ер һөрөүгә әйләндереп иҫәпләгәндә, 10 июнгә 110 процентҡа үтәлде.

Тракторҙар паркын файҙаланыуҙың төрләсә булыуы кешеләрҙең үҙҙәре өҫтөнә алған социалистик йөкләмәләрен үтәү өсөн төрлөсә көрәшеүҙәрен күрһәтә. Бына, миҫалға Туймазы районын алайыҡ. Ул яҙғы сәсеүҙе уңышлы алып барҙы, пар һөрөүҙе тамамланы. ВКП(б)-ның Туймазы райкомы һәм район Советы исполкомы пар һөрөүҙе һуҡлатыуға юл ҡуйманылар. Бында пар һөрөү сәсеү эштәре менән параллель рәүештә алып барылды. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, республиканың башҡа күп райондарына ҡарата быны әйтеп булмай. Беҙ, тәүҙә сәсеү эштәрен бөтөрөргә, ә унан һуң пар күтәреүҙе башларға, — тигән зарарлы традицияны һаман да бөтөргәнебеҙ юҡ әле. Зианчура, Көйөргәҙе, Хәйбулла, Федоровка һәм башҡа райондарҙың етәкселәре шулай эш итәләр. Улар пар һөрөүҙе яңы ғына башланылар.

Республиканың күп кенә райондарында яҙғы сәсеү тамамланғандан һуң партия ойошмаларының ойоштороу һәм политик эштәре йомшарҙы һәм, шуның һөҙөмтәһендә, баҫыуҙарҙа эшләү һүлпәнәйҙе. Йомшаҡ ер һөрөүгә әйләндереп иҫәпләгәндә, республика буйынса пар һөрөү һуңғы биш көнлөктә, өсөнсө биш көнлөккә ҡарағанда, 70 мең гектарға кәмерәк булды. Мәҫәлән, Мәсетле районында май айының һәр бер биш көнлөгөндә 5 мең гектар самаһы иген сәстеләр, 2 мең гектарҙан күберәк ер һөрҙөләр, ә 5 июндән алып 10 июнгә тиклем бер мең гектар ғына иген сәселде һәм 998 гектар ғына пар һөрөлдө. Йомағужа районында май айында 4 мең гектарҙан артыҡ ашлыҡ сәстеләр һәм 2 мең гектар самаһы ер һөрҙөләр, ә бына июнь айының тәүге биш көнлөгөндә 284 гектар ғына пар һөрҙөләр. Көйөргәҙе районында биш көнлөктә, май айы урталарында һөрөлгәнгә ҡарағанда, 2 мең гектарға кәмерәк һөрәләр, тип әйтерлек.

Бына шунда беҙҙең резервтарыбыҙ һәм улар айырым райондар буйынса бына шулай әрәм ителәләр.

Нәҡ тракторҙар өсөн яғыулыҡ мәсьәләһен алығыҙ. Башҡортостан шарттарында, яғыулыҡтың эшләгән урынында, уның менән ваҡытында тәьмин ителмәү — юл ҡуйғыһыҙ факт, ә шулай булыуға ҡарамаҫтан, ундай хәлдәр йыш ҡына булғылай. Бында кем ғәйепле? Был эш менән шөғөлләнеүсе иптәштәр ғәйепле. Ауыл хужалығы министры иптәш Денисов ғәйепле, машина-трактор станцияларына етәкселек итеүсе иптәш Әделшин ғәйепле, был эш өсөн Министрҙар Советында яуаплылыҡ алып барған иптәш Ермолаев һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында иптәш Путыкевич ғәйепле. Был иптәштәр МТС-тарҙың беҙҙең республикабыҙҙа күп булған яғыулыҡ менән өҙлекһеҙ тәьмин ителеүен тәьмин итергә тейештәр ине.

Шунан ары, колхоздарҙы ныҡытыуҙа һәм ауыл хужалығын тиҙерәк күтәреүҙә колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһы мөһим резервтарҙан булып һанала.

Үткән йылда күп кенә райондарҙа хеҙмәткә яраҡлы бер колхозсыға эшләп сығарыу байтаҡ артты. Мәҫәлән, Дыуан районында хеҙмәткә яраҡлы бер колхозсыға уртаса 280 хеҙмәт көнө, Дәүләкән районында — 268, Хәйбулла районында — 263, Туймазы районында — 255 хеҙмәт көнө эшләнгән. Ләкин тотош республикала бер колхозсыға эшләп сығарыу 1947 йылда түбән булды һәм 1948 йылда ла шул хәлендә ҡалыуында дауам итә. Ауырғазы районының колхоздарында 1947 йылда хеҙмәткә яраҡлы бер колхозсы 171, Воскресен районында —169, Нуриман районында — 178, Илеш районында — 183, Благовар районында — 180, Федоровка районында — 163 хеҙмәт көнө эшләгән. 1947 йылда республика күләмендә өс мендән артыҡ колхозсы бер генә хеҙмәт көнө лә эшләмәгән.

Иптәштәр, әгәр һәр бер колхозсы хеҙмәт көнө минимумын үтәгән булһа, беҙ бөтә ауыл хужалығы эштәренең дә темптарын күп тапҡырҙар тиҙләткән һәм, һис шикһеҙ, баҫыуҙарҙың урожайлығын һәм малсылыҡтың продукт биреүсәнлеген сериҙ рәүештә күтәргән булыр инек.

Хеҙмәт көнө минимумы колхозсылар менән колхозсы булмаған кешеләр араһында сик булып тора. Хеҙмәт көнө минимумын бары тик ялҡауҙар һәм колхоз производствоһын тарҡатыусылар ғына эшләмәүе мөмкин. Ә үҙ эшенә намыҫлы ҡараған колхозсылар был минимумды өс, дүрт һәм биш тапҡырға арттырып үтәйҙәр.

Беҙ артель производствоһында ҡатнашмаусы, колхозды тарҡатыусы, хеҙмәт итмәй, башҡа доходҡа йәшәүсе—спекуляция яһаусы һәм колхоз байлығын әрәм-шәрәм итеүсе, башҡа намыҫлы колхозсылар өсөн билдәләнгән льготаларҙан файҙаланып ятыусы бөтә ялҡауҙарға, әрәм тамаҡтарға һәм ялған колхозсыларға ҡаршы иң ҡаты көрәш алып барырға тейешбеҙ. Коллектив хеҙмәттән намыҫлы юлы менән барырға теләмәүселәрҙең һәр береһенә ҡаршы общественный фекер тыуҙырырға кәрәк.

Хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу һәм хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу мәсьәләләрен дөрөҫ хәл итеү өсөн беҙ һәр бер колхоздың эшенә яҡшылап төшөнергә, уларҙың эшендәге етешһеҙлектәрҙе аса һәм был етешһеҙлектәрҙә ғәйеплеләрҙе күрә белергә тейешбеҙ.

Беҙ ялҡауҙарға һәм эшләкһеҙ колхозсыларға, колхоз байлығын әрәм-шәрәм итеүселәргә ҡарата колхозсыларҙы килешә алмаусанлыҡ тойғоһонда тәрбиәләргә тейешбеҙ. Колхозсыларҙы хеҙмәткә коммунистик мөнәсәбәт рухында тәрбиәләү буйынса беҙ бөтә большевистик тырышлыҡ һәм ныҡышмалылыҡ менән эш алып барырға бурыслыбыҙ.

Хеҙмәт дисциплинаһын ныҡытыу һәм хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү маҡсаттарында, хөкүмәттең ҡарары менән күҙҙә тотолған дәртләндереү сараларын киң ҡулланырға кәрәк. Ауыл хужалығы артеленең өлгө Уставында яҡшы эшләгән өсөн хеҙмәт көнө яҙыуҙы йәки насар эшләгән өсөн хеҙмәт көнөн кәметеүҙе күҙҙә тотоусы 15-се пунктты беҙҙең күп колхоздарыбыҙҙа оноталар. Хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреүҙең был рычагын беҙ файҙаланмайбыҙ. Юғары урожай алыу өсөн, пландан тыш һөт һауып алыу һәм йәш малдарҙы тәрбиәләп үҫтереү өсөн өҫтәмә хеҙмәт хаҡы түләү эше лә, шулай уҡ, беҙҙә тейешенсә һәм бөтә урында ла ҡулланылмай.

Колхозсыларға өҫтәмә хеҙмәт хаҡы түләү билдәләүҙә беҙгә төп ҡомасаулыҡ иткән нәмә—ул хеҙмәтте иҫәпкә алыуҙың насар ҡуйылышында. Һәм беҙ бында күп нәмәне юғалтабыҙ. Колхоздарҙа хеҙмәттең дөрөҫ иҫәпкә алып барылмауы колхозсыларҙың материаль ҡыҙыҡһыныу нигеҙҙәрен ҡаҡшата һәм беҙҙең колхоздарыбыҙға туранан-тура зыян килтерә.

Беҙ колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороуҙы яҡшыртыу, баҫыусылыҡ бригадаларын һәм звеноларын ныҡытыу юлында күп һәм ныҡышмалы эшләргә, хеҙмәтте түләү тураһындағы законды ныҡ күҙәтергә тейешбеҙ.

(Аҙағы 2-се биттә).

*) Иптәш С. Ә. Ваһаповтың телмәре ҡыҫҡартылып бирелә.

Башҡортостан партия ойошмаһының яҡындағы бурыстары тураһында

ВКП(б) Өлкә Комитете секретаре иптәш С. Ә. Ваһаповтың ВКП(б) Өлкә Комитете пленумында 18 июнда һөйләгән телмәре

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

Иптәштәр, ағымдағы һәм алда торған ауыл хужалығы эштәрен күтәреү буйынса был пленумда практик бурыстарыбыҙ етерлек тиклем ентекле рәүештә тикшерелде. Беҙ бер генә көнгә лә һуҙлатмай сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләүҙе ойошторорға тейешбеҙ. Был —бөгөнгө көндөң иң төп бурысы.

Ниндәй генә яҡшы орлоҡтар сәселмәһен, беҙҙең баҫыуҙарҙа сәсеүлектәрҙең сығышы нисек кенә яҡшы булмаһын, теләгән бер сәсеүлек яҡшы тәрбиәләүҙе талап итә. Ашлыҡты һәм башҡа культураларҙы үҙ ваҡытында һәм бер нисә ҡат утау—ул юғары урожай алыуҙы, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың юғары доход алыуын тәьмин итеү, тигән һүҙ.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү мәсьәләһе быйыл беҙҙең алдыбыҙға айырыуса яуаплы бурыстар ҡуя. Тупраҡта дым етерлек түгел. Шуға күрә беҙҙең баҫыуҙарыбыҙ ҡый үләндәренән тамам таҙартылған булырға тейеш. Бары тик шул шарттарҙа ғына беҙ яҡшы урожайға өмөт итә алабыҙ.

Беҙ шулай уҡ, һис кисекмәй, бесән йыйнау эшенә башларға һәм уны урожай йыйнау башланғанға тиклем тамамларға тейешбеҙ.

Быйыл, үткән йылға ҡарағанда, урожай йыйнауға элегерәк тотонорға тура килер. Бөтә мәғлүмәттәр буйынса, көҙҙөң ямғырлы булыуы көтөлә. Ә был, ашлыҡтарҙы йыйнау эшен, һис һүҙһеҙ, ҡыйынлаштырасаҡ. Шулай булғас, урожай йыйнауға бөтә яҡлап әҙерлекте тәьмин итергә кәрәк.

Быйыл йыйналасаҡ урожай майҙаны, үткән йылға ҡарағанда, 405 мең гектарға күберәк тәшкил итә. Ә урожай йыйнау машиналарының паркы үткән йылғынан артмай тип әйтерлек. Тимәк, бурыс—беҙҙең ҡулыбыҙҙа булған урожай йыйнау средстволарын максималь рәүештә эффектле файҙаланыуҙан, индивидуаль сдельщинаны киң ҡулланып, ҡул менән урыу эшен ысын мәғәнәһендә ойоштороуҙан тора.

Комбайндар һәм ябай урыс машиналарын яҡын ваҡыт эсендә ремонтлап бөтөргә, ялмалы ырҙындарҙы ремонтларға һәм яңыларын төҙөргә, иген киптереү урындарын тәртипкә килтерергә, ә булмаған урындарында яңыларын, бигерәк тә Гоголев системаһындағы иген киптергестәрҙе, төҙөргә тейешбеҙ. Ундай иген киптергестәрҙе һәр бер колхозда булдырырға кәрәк. Үткән йылда иген киптергестәрҙең булмауы, хатта ҡоро көндәрҙә лә, иген тапшырыуҙа серьез ҡомасаулыҡ килтерҙе.

Юлдарҙың торошо урожай йыйнау ауыл хужалығы продуктыларын әҙерләү эшен уңышлы үткәреүҙә мөһим әһәмиәткә эйә. Әгәр беҙ юлдарҙы [illegible] — отторок тиган һүҙ.

Бөтә транспорт средстволарын — автомашина, арба, фургон, бестаркаларын, тоҡтарҙы һәм башҡа кәрәк-яраҡтарҙы урожай йыйнау эштәре башланғанға тиклем тулы әҙерлек хәленә килтерергә [illegible] тораһы ла юк.

Ашлыҡтарҙы һуғыу беҙҙән ҙур эш талап итәсәк. Беҙгә ашлыҡ һуғыу машиналарының етешмәүенә осрарға тура килә, шуға күрә лә уларҙың бөтәһе лә [illegible] ... Молотилкаларҙы колхоздарға бүлеп [illegible].

Иптәштәр, ВКП(б) Үҙәк Комитете Башҡортостан өлкә партия ойошмаһының ауыл хужалығын күтәреү өлкәһендәге эшен беҙҙең игенде әҙерләү планын нисек башҡарыуыбыҙ буйынса ҡарап баһаласаҡ. Иген әҙерләү — ауыл хужалығы эшебеҙҙең төп һынауы [illegible] ... колхозсылар, МТС һәм совхоз эшселәре, ауыл хужалығы специалистәрен [illegible] ... был ... тора.

Беҙҙең иң мөһим бурысыбыҙ урожай йыйнауҙы [illegible] ... ойоштороуҙан тора. Иптәш Сталинға яҙған хатыбыҙҙа беҙ иген әҙерләү планын срогынан алда тултырырға вәғәҙә бирҙек. [illegible] ... һәм совхоздар ҙа, урожай йыйнауҙың беренсе көндәренән уҡ, иген

сығарыу графиген ныҡ һаҡлаһындар һәм үҙҙәренең беренсе һәм изге бурыстарын срогынан алда үтәһендәр.

Иген әҙерләү менән бер рәттән, беҙ шулай уҡ ауыл хужалығының башҡа продуктыларын әҙерләүҙе лә ойошҡан рәүештә үткәрергә тейешбеҙ.

Үҙгән йыл теге йәки был райондың иген әҙерләүҙә ҡәнәғәтләнерлек эшләп тә, башҡа төр ауыл хужалығы продуктыларын әҙерләүҙе өҙөү ваҡиғалары байтаҡ булды. Беҙ быға бер нисек тә юл ҡуя алмайбыҙ һәм, шуға күрә, иген әҙерләү планын үтәү менән бер рәттән, әҙерләүҙәрҙең башҡа бөтә төрҙәренең дә планын үтәүҙе талап итәсәкбеҙ.

Өлкә партия ойошмаһы, ВКП(б)-ның өлкә һәм район комитеттәре государство интерестәрен һаҡлауҙа ныҡ торһалар ғына һәм государствоға ҡаршы тенденцияларҙың бәләкәй генә күренештәрен дә үҙ ваҡытында бөтөрә барһалар ғына, иген әҙерләүҙе уңышлы үткәреү мөмкин буласаҡ. Государство заданиеһен үтәү өсөн һәр бер коммунистең яуаплылыҡ хисен күтәрергә, государство дисциплинаһын ныҡытырға кәрәк.

Шулай ҙа, әйтергә кәрәк, беҙҙә государство интерестәрен һанға һуҡмаусы, государство дисциплинаһын бер ҙә иҫе китмәй генә боҙоусы айырым коммунистәр — етәкселәр бар әле.

Беҙ юл ҡуйылмаҫлыҡ яҡташлыҡ күрһәтеү, бер райондың интерестәрен республика һәм государство интерестәренән юғары ҡуйыу фактыларын йыш ҡына осратабыҙ. Бына государство эшенә шундай ҡараштың миҫалы. Быйыл яҙ Бурлы МТС-ына 5 НАТИ тракторы ҡайтты, уларҙың өсәһе Ауырғазы районына бирелергә тейеш ине. ВКП(б)-ның Ғафури райкомы секретаре иптәш Гәрәев, Ауыл хужалығы Министерствоһының разнарядкаһы менән иҫәпләшеп тә тормайынса, Бурлы МТС-ы директорына тракторҙарҙың бишеһен дә Ғафури районы колхоздарында ҡалдырырға ҡушҡан.

Ауырғазылылар яҙғы сәсеүҙең ҡыҙыу осоронда ике тапҡыр тракторҙарҙы алыу өсөн барып буш әйләнеп ҡайттылар. Бары тик партия Өлкә Комитете был эшкә ҡатнашҡандан һуң ғына, ауырғазылылар үҙҙәренә билдәләнгән тракторҙарҙы ала алдылар.

Баймаҡ районының етәкселәре — партия райкомы секретаре иптәш Любушкин һәм район Советы исполкомы председателе иптәш Рәфиков, Әбйәлил МТС-ының тракторҙарын үҙҙәренлә тотоп, шундай уҡ зарарлы ҡараштың яҡлауҙы күрһәттеләр. ВКП(б)-ның Хәйбулла райкомы секретаре иптәш Арсланов та шулай эшләне.

Государство дисциплинаһына баш-баштаҡлыҡ менән ҡарауҙың өлгөһө колхоз председателдәре курсына набор уҙғарыуҙа ла күренде. Был курс бары тик тыңлаусылар булмау арҡаһында ғына ӕс ай буйына нормаль эшкә тотона алманы. Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ауыл хужалығы Министерствоһы был уңай менән бөтә райондарға ла ҡәтғи телеграммалар ебәрһәләр ҙә, байтаҡ ҡына райондарҙың етәкселәре, государство дисциплинаһы тураһында онотоп, Министрҙәр Советының күрһәтмәһен үтәүҙе үҙҙәренә мәжбүри итеп иҫәпләмәйҙәр һәм курсанттар ебәрмәйҙәр.

Унан һуң, партияның һәм хөкүмәттең яҙғы сәсеү планын һис бер һүҙһеҙ үтәү тураһындағы директиваларына сиктән тыш яуапһыҙ ҡарау фактын беҙ Дәүләкән районында күрәбеҙ. Был районда яҙғы сәсеү планын үтәү өсөн бөтә мөмкинлектәр ҙә бар ине. Ләкин, яҙғы эштәр тамамланыр алдынан, Дәүләкән районының өс мең гектар самаһы бойҙай сәсеп еткермәүе билдәле булды, ә ВКП(б) райкомы секретаре иптәш Масленников сәсеү эшенең үтәлеп етмәүе тураһында партия Өлкә Комитетына белдереүҙе лә кәрәк тапмаған.

Государствоның бик мөһим заданиеларен үтәүгә быңдай яуапһыҙ ҡарашты беҙ ҡаты ғәйепләргә, ә государство дисциплинаһын боҙоусыларҙы иң ҡаты партия һәм государство яуаплылығына тартырырға тейешбеҙ.

Тимер дисциплина — большевиктар партияһының законы. Бары тик государство һәм партия дисциплинаһын ныҡлы һаҡлағанда ғына, беҙ партия ойошмаһы алдына республикабыҙҙың экономикаһын һәм культураһын күтәреү буйынса ҡуйылған гәйәт ҙур бурыстарҙы башҡара алырбыҙ, һуғыштан һуңғы сталинсе биш йыллыҡ планды уңышлы рәүештә һәм ваҡытынан алда үтәп сығырбыҙ.

Республикабыҙҙың һәр бер хеҙмәтсәнеңен Ватаныбыҙ алдындағы үҙ бурысын ныҡлап аңлауына, партиябыҙ һәм Совет Хөкүмәтенең директиваларын үтәү өсөн уның яуаплылығын күтәреүгә беҙ пропаганда һәм агитацион-массовый эште көсәйтеү һөҙөмтәһендә генә өлгәшә алырбыҙ.

Башҡортостан партия ойошмаһы составында коммунистәрҙең күп булыуы, коммунистәрҙе политик ағартыу буйынса, быға тиклемгә ҡарағанда, айырыуса ныҡышмалы һәм тәрән эстәлекле эш алып барырға беҙҙе мәжбүр итә.

Партия өлкә конференцияһы ҡарарында коммунистәрҙең марксистик-ленинсе уҡыуҙарын ойоштороуҙағы һәм хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эштең ҡуйылышындағы ҙур ғына етешһеҙлектәр билдәләп үтелгәйне. Конференциянан һуң был йүнәлештә бер аҙ эш башҡарылды һәм ошо пленумда иптәш Шафиковтың докладында был турала әйтелде.

Марксистик-ленинсе белемдәрҙең энциклопедияһы булған «ВКП(б) тарихенең Ҡыҫҡаса курсын» коммунистәрҙең үҙ алдарына өйрәнеүҙәренең әле беҙҙә ҡәнәғәтләнерлек булмауын да танырға кәрәк. Түңәрәктәрҙә лә партия тарихен өйрәнеү ҡәнәғәтләнерлек ҡуйылмаған, түңәрәктәрҙең бары тик биштән бер генә өлөшөнән үҙ эшен нормаль тамамлау факты быны асыҡ күрһәтә.

Ошо ике ҙур етешһеҙлекте төҙәтер өсөн коммунистәрҙең үҙ алдарына уҡыуҙарына систематик контроль булдырырға һәм, шуның менән бергә, марксистик-ленинсе теорияны үҙ алдарына өйрәнеүселәргә максималь ярҙам күрһәтергә кәрәк.

Биш мең пропагандист әҙерләүҙе пропагандистик эште яҡшыртыуҙың иң мөһим шарты тип иҫәпләргә кәрәк. Был еңел бурыс түгел, ләкин беҙ уны үтәргә тейешбеҙ. Партия мәғарифен уның бөтә тармаҡтарында ла яҡшыртыу өлкәһендә беҙ эшләргә тейешле иң мөһим эш — ул түңәрәктәрҙең, мәктәптәрҙең, семинарҙарҙың эш сифатын күтәреү, телдән һәм матбуғат пропагандаһын яҡшыртыу. Яҡшы әҙерләкле пропагандистәрҙән башҡа быны эшләү мөмкин түгел.

Беҙҙе теге йәки был коммунистең мәктәпкә йәки түңәрәккә нисек йөрөүе түгел, ә бөтәһенән элек, уның марксистик-ленинсе теория нигеҙҙәрен нисек төшөнөүе һәм уның үҙенең практик эшендә ошо политик белемдәрен нисек файҙаланыуы ҡыҙыҡһындырырға тейеш.

Хеҙмәтсәндәр араһында массовый-политик эште ойоштороуҙа ике бурысты хәл итергә: беренсенән — хеҙмәтсәндәр алдында үткәрелә торған беседаларҙың, лекцияларҙың һәм докладтарҙың сифатын яҡшыртырға, һәм икенсенән — хеҙмәтсәндәр массаһының иң киң ҡатламын массовый-политик эш менән солғап алырға кәрәк. Тегеһе лә, быныһы ла агитаторҙар менән систематик эш алып барыуҙы талап итәсәк. Шуны ҡағиҙә итеп алырға кәрәк — колхоздарҙа һәм предприятиеларҙа агитколлективтарға партия ойошмаларының секретарҙары үҙҙәре етәкселек итһендәр. Улар ағымдағы политик бурыстар тураһында, производство пландарының үтәлешенең барышы тураһында агитаторҙарға информация яһарға, алда торған беседаларҙың темалары буйынса инструктаж бирергә тейештәр. Шулай уҡ квалификациялы пропагандистәрҙе, уҡытыусыларҙы, ауыл хужалығы специалистәрен һәм промышленность предприятиеларендағы инженер-техник работниктәрҙе ошо маҡсаттарҙа файҙаланырға кәрәк.

Өлкә партия конференцияһы ағымдағы политик темаларға докладтар менән эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең, колхозсыларҙың һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың, совхоз һәм МТС эшселәренең йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәреүҙе беҙҙең алға бурыс итеп ҡуйҙы. Был йыйылыштарҙың бөтә урындарҙа ла үткәрелеүенә өлгәшергә кәрәк. Ошо йыйылыштарҙа хеҙмәтсәндәр алдында партия, совет һәм хужалыҡ эштәрендә эшләүсе етәксе работниктәрҙең сығыш яһауҙары ла шулай уҡ мөһим.

Ауылда беҙҙең бөтә агитацион эшебеҙ һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитете февраль Пленумының тарихи ҡарарҙарының үтәлеүенә һәм шулай уҡ республикабыҙҙың ауыл хужалығы работниктары тарафынан иптәш Сталинға яҙған хатта алынған социалистик йөкләмәләренең үтәлеүенә йүнәлтелгән булырға тейеш.

ВКП(б) Үҙәк Комитеты февраль Пленумы тарафынан билдәләнгән бурыстарҙы ауыл хужалығы эшсәндәренә аңлатып, беҙ республикабыҙҙың һуғыш алдынан булған 1940 йылдағы кимәленә өлгәшер өсөн беҙгә әле бик күп эшләһе барлығын айырыуса әйтергә тейешбеҙ. Ауыл хужалығын үҫтереүҙә ошо һуғышҡа тиклемге кимәлгә өлгәшеүҙә үҙебеҙҙең әле бик ныҡ артта ҡалыуыбыҙҙы онотторға ярамай, ә беҙгә бит ул кимәлде етергә генә түгел, уны үтеп китергә кәрәк.

Ҡала хеҙмәтсәндәре араһында агитацион-массовый эш, бөтәһенән элек, производствоның айлыҡ, квартал һәм йыллыҡ пландарын ваҡытынан алда үтәүгә йүнәлтелгән булырға, һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ планды дүрт йылда үтәү бурысына буйһондоролған булырға тейеш.

Республикабыҙҙа беренсе ике йыллыҡ программаны үтәмәгән һәм биш йыллыҡтың ошо өсөнсө йылында ла артта ҡалыуҙа дауам иткән күпкенә предприятиелар бар. Эре предприятиеларҙан Стәрлетамаҡтағы станоктар төҙөү заводы бик насар эшләй. Яңы нефть ятыштарына разведка яһау эше лә беҙҙә шәптән түгел. «Башнефтеразведка» тресы һәм нефть сығарыусы трестарҙың бораулау конторалары ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр. Һуңғы айҙарҙа Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы ҡарамағындағы промышленностең эше лә насарайҙы. Азыҡ промышленносе Министерствоһының һәм урындағы ағыулыҡ промышленноcенең предприятиелары серьез рәүештә артта ҡалалар. Урман промышленносе Министерствоһы үҙ өҫтөнә йөкмәтелгән бурыстарҙы ҡуралата үтәй алмай һәм производство планын систематик рәүештә үтәмәй.

Республикабыҙҙағы промышленность предприятиеларенең уңышлы эшләүҙәре хәҙер күбеһенсә беҙҙең хеҙмәтсәндәрҙең тормош ихтыяждары тураһында хәстәрлек күреүебеҙгә бәйләнгән буласаҡ. Һуғыш ваҡытындағы закондар, йәғни предприятиеларҙән эшсе көстө мәжбүри мобилизация тәртибендә алыу тәртибе аҡрынлап бөтөрөлә бара. Әгәр ҙә яҡшы торлаҡ менән тәьмин итһәк, юғары етештереүсән эш һәм яҡшы хеҙмәт хаҡы алыу өсөн яҡшы шарттар тыуҙырһаҡ, завод поселкаларында эшселәрҙең балалары өсөн мәктәптәр һәм азыҡ, промышленность тауарҙары һата торған яҡшы сауҙа селтәре булдырһаҡ ҡына, предприятиеларҙа эшселәрҙе ныҡытып ҡалдырырға мөмкин буласаҡ.

Ләкин, был эштә беҙҙә әле бик күп етешһеҙлектәр һәм кәмселектәр бар. Массовый-политик эш алып барған ваҡытта был етешһеҙлектәрҙе йәшерергә ярамай. Киреһенсә, уларҙы асырға, конкрет ғәйепләләрҙе табырға һәм хеҙмәтсәндәрҙең тормош шарттарын тиҙерәк яҡшыртыуға өлгәшергә кәрәк. Беҙҙең ҡалаларҙа һәм эшселәр поселкаларында торлаҡ төҙөлөшө йәй көнө бигерәк тә ҡыҙыу йәйелдерелергә тейеш.

Беҙ, әлбиттә, ҡалала ғына түгел, ауылда ла хеҙмәтсәндәрҙең көн-күрешен яҡшыртыу буйынса эш алып барырға бурыслыбыҙ. Ауыл ерҙәрендә сауҙа эшен һәр яҡлап йәйелдерергә һәм яҡшыртырға, дауалау учреждениеларенең, мәктәптәрҙең, балалар учреждениеларенең нормаль эшләүҙәрен күҙәтергә кәрәк.

Алда торған урожай йыйнауға әҙерлек айканлы, балалы ҡатындарҙы колхоз производствоһында ҡатнаштырыу өсөн беҙгә бөтә урындарҙа ла балалар йәслеләре һәм балалар майҙандары ойоштороу бурысын хәл итергә кәрәк.

Башҡортостан партия ойошмаһы үҙенең бөтә көсөн, пропаганда һәм агитацион-массовый эште тамырынан уҡ яҡшыртыу нигеҙендә республиканың ауыл хужалығы эшсәндәрен иптәш Сталин алдында алынған йөкләмәләрҙе үтәүгә, ауыл хужалығы йылын уңышлы рәүештә үтәүгә һәм иген әҙерләү планын ваҡытынан алда үтәүгә мобилизовать итеүгә йүнәлтерергә тейеш. Беҙ республиканың бөтә хеҙмәтсәндәрен һуғыштан һуңғы биш йыллыҡ план тарафынан билдәләнгән бурыстарҙы хәл итеүгә мобилизовать итергә тейешбеҙ.

Государство сиге тураһында СССР Хөкүмәте менән Финляндия республикаһы хөкүмәте араһында конвенция төҙөү

Совет-Финляндия сигендәге сик өсөн булған дәғүәләрҙе һәм ғауғаларҙы юлға һалыу тәртибе тураһында 1948 йылдың 19 июнендә Мәскәүҙә ССР Союзы Хөкүмәте менән Финляндия республикаһы хөкүмәте араһындағы конвенцияға ҡул ҡуйылды.

Был конвенцияны төҙөү хаҡындағы 8 июндә башланған һөйләшеүҙәр дуҫлыҡ обстановкаһында һәм үҙ-ара аңлашыу рухында үтте.

Конвенцияға ҡул ҡуйыусылар: Совет яғынан И. В. Маевский һәм полковник М. В. Петрунькин; Финляндия яғынан профессор И. Бонсдорф һәм полковник К. Сомерто.

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүсе Мәләүез районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының бөтә төҙөүсе колхозсыларға һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарға мөрәжәғәте

Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитете Ишембай—Ермолаевка тимер юлын һалыуҙы халыҡ төҙөлөшө тип иғлан иттеләр.

Башҡорт халҡы был ҡарарҙы ҙур шатлыҡ менән ҡаршы алды, колхоздар ер эштәренә иң яҡшы кешеләрҙе, социалистик баҫыу стахановсыларын ебәрҙеләр.

Көйөргәҙе күмеренә сығырға мөмкинлек бирәсәк, иң йыраҡ окраиналарҙы республиканың культура һәм промышленность үҙәктәре менән бәйләү средствоһы булып хеҙмәт итәсәк яңы юлдың мөһим государство әһәмиәтендәге эш булыуы һәр кемгә асыҡ билдәле. Яңы юл беҙҙең райондарҙа экономиканы һәм культураны тиҙерәк күтәрергә мөмкинлек бирәсәк.

Ер эштәре иң тиклем тиҙерәк тамамланһа, шул тиклем яҡшы буласаҡ. Беҙ тимер юлсыларға шпалдар һәм рельстар һала башларға иң тиклем тиҙерәк мөмкинлек бирһәк, нәүбәттә торған ауыл хужалығы эштәрен башҡарыу — эшкәртеү, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, бесән сабыу, урожай йыйнау өсөн эшсе көсөн шул тиклем тиҙерәк бушатасаҡбыҙ.

Беҙ, Мәләүез районы колхозсылары, төҙөлөштә эшләүсе бөтә колхозсыларҙы күләм заданиеһен срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киңерәк йәйелдерергә саҡырабыҙ.

Беренсе көндәрҙең һөҙөмтәләре: Иҫке-Муса ауыл Советының «Рассвет I», «Рассвет II», «Пробуждение», Ерған ауыл Советының «Пробуждение», Северный ауыл Советының «Золотой колос», «Смычка», «За высокий урожай», «Шишма», «Красный Восток», «Үрнәк», «Сеңгә ҡул», Молотов исемендәге колхоздары, «Красная Поляна» һәм башҡа ауыл хужалығы артелдәренең төҙөлөштә эшләүсе колхоз бригадалары индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщинаны ҡулланып, 5 көн эсендә эшләп сығарыу нормаларын арттырып үтәгәнлектәрен, күләм заданиеһын 50 процентҡа үтәгәнлектәрен күрһәтте.

Беҙ трассала 40 көнлөк эш планын 20 көндә үтәргә, бөтә эштәрҙе 1948 йылдың 1 июленә тамамларға йөкләмә алабыҙ.

Беҙ төҙөлөштә эшләүсе бөтә райондарҙың колхозсыларын беҙҙең менән тиңләшергә саҡырабыҙ.

Беҙҙең һөйөклө Ватаныбыҙҙың тағы ла тиҙерәк үҫеүе һәм нығыуы өсөн, Ишембай—Ермолаевка тимер юл төҙөлөшөн ысын халыҡ төҙөлөшөнә әйерелдерәйек!

Йәшәһен беҙҙең ҡеүәтле Тыуған илебеҙ!

Йәшәһен беҙҙең еңеүҙәребеҙҙе ойоштороусы коммунистар партияһы!

Йәшәһен беҙҙең тәрән аҡыллы юлбашсыбыҙ һәм остазыбыҙ иптәш Сталин!

ВКП(б) Өлкә Комитетенда

ВКП(б) Өлкә Комитете бюроһы Ишембай — Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә Мәләүез районы колхозсыларының һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарының бөтә төҙөүселәргә ер эштәрен 40 көн урынына 20 эш көнөндә тамамлауға саҡырған инициативаларын яҡланы.

ВКП(б)-ның Өлкә Комитете бюроһы Ишембай—Ермолаевка тимер юлында эшләүсе райондарҙың партия район комитеттәре һәм район Советы башҡарма комитеттәренә Мәләүез районы колхозсыларының саҡырыуын яҡлап, социалистик ярыш һәм массовый-политик эш ойоштороу нигеҙендә бөтә ер эштәрен тамамлау буйынса алған йөкләмәне ошо йылдың 1 июленә үтәүгә өлгәшергә тәҡдим итте.

Ҡый үләндәренә ҡаршы көрәш— юғары урожай өсөн көрәш

Йәштәр сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләйҙәр

ҮРГЕ-ҠЫЙҒЫ. (Телеграф аша). Район колхоздарының комсомолецтары һәм союздан тыш йәштәре 1948 йылда юғары урожай үҫтереү тураһында иптәш Сталинға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн яҡшы көрәшәләр. Сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләйҙәр. Колхоздарҙа комсомолецтарҙан һәм йәштәрҙән ойошторолған 25 звено быйыл 407 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлектәрен тәрбиәләй. Бөтә звенолар ҙа үҙ участкаларында сәсеүлектәрҙе беренсе ҡат утауҙы 15 июнгә тамамланылар.

Киров исемендәге колхозда комсомолка иптәш Роза Валиева етәкселек иткән йәштәр звеноһы айырыуса тырышлыҡ күрһәтә. Звено 12 кешенән тора. Улар үҙҙәренең участкаларындағы 4[illegible] гектар һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлеген ике тапҡыр утанылар. Звено хәҙер дөйөм майҙандағы сәсеүлектәрҙе таҙартыуҙа [illegible] ҙам итә. «Ҡыҙыл урал» колхозында иптәш Минһажева етәкселек иткән йәштәр звеноһы 32 гектар майҙанда һабан ашлыҡ культуралары сәсеүлектәрен утауҙы 4 [illegible] көнөндә тамамланы. Алдынғы комсомолка иптәш Якупова [illegible] һайын 0,50 гектар урынына 0,8[illegible] гектар майҙанды утай. Звено [illegible] гектар бойҙай сәсеүлеген өҫтәмә аҙыҡландырҙы.

Т. Нурмөхәмәтов.
ВЛКСМ-дың Ҡыйғы район[комы] секретаре.

Икенсе тапҡыр утайҙар

Салауат районының «Әй» колхозында (председателе иптәш Хажин) сәсеүлектәр ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләнә. Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар бөтәһе лә берҙәй булып утауға йөрөйҙәр һәм баҫыуҙа бер генә ҡый үләне лә ҡалдырмаҫ өсөн ярышып эшләйҙәр.

Колхозда хәҙер 474 гектар [illegible] ҙан ҡый үләндәренән таҙартылды. Тәжрибәле игенсе Мөхәмәтш[illegible] етәкселек иткән эләүнгы зве[ноһы] хәҙер икенсе тапҡыр утау ойошторҙо. Утаусылар көндәлек нормаһы 150 — 200 процент үтәйҙәр.

Ә. Сәдиҡова.

Ҡый үләндәренә ҡаршы массовый поход

Дәүләкән районы «1 Май» колхозының бригадире, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш Стоянов сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыу эшендә бик яҡшы инициатива күрһәтте. Баҫыуҙарҙа ҡый үләндәре ҡалҡып сыҡҡас та, ул үҙенең бөтә бригадаһы менән утауға сыҡты. Унда бригадалағы малсылыҡ работниктәре лә, ҡараусылар ҙа, ҡарттар ҙа һәм уҡыусы балалар ҙа ҡатнаштылар. Улар үҙҙәренә бүленеп бирелгән участкаларҙа сдельщина нигеҙендә, бөтә баҫыуҙы иңләп, ярышып эшләнеләр. Бер аҙна ваҡыт эсендә бригаданың бөтә сәсеү майҙаны ҡый үләндәренән таҙартылды. Һуңынан йылы ямғырҙар үтте. Хәҙер баҫыуҙа ашлыҡтар бик яҡшы [illegible]ләр.

Социалистик Хеҙмәт Геройы [ип]тәш Стояновтың был инициатива[һ]ын ҡеүәтләп, ВКП(б)-ның Дә[үлә]кән райкомы бөтә районда [ҡый] үләндәренә ҡаршы массовый [по]ход иғлан итте. Хәҙер көн һайын район колхоздарының баҫы[уҙа]рында 14—15 мең колхозсы у[тау]ҙа ҡатнаша. Уларҙың 25 [мең]е уҡыусылар. Районда 40 мең [гек]тарға яҡын ашлыҡ ҡый үлән[дәрен]ән таҙартылды. «Париж ком[му]наһы», «Новый быт», «Бик-[з]малы» һәм башҡа күп колхоз[дар] был эште тулыһынса тамамла[ды]лар.

Х. Рафиков.

ҺӘР БЕР КОЛХОЗ БУЙЫНСА ПАР ҺӨРӨҮ ПЛАНЫН ТУЛЫҺЫНСА ҮТӘРГӘ!

Ял дауам итә...

Ауыл хужалығы бүлеге статистиге иптәш Яппаров бөтә бүлмәне яңғыратып, телефон трубкаһына ҡысҡырҙы:

— «Салауат», ә «Салауат»! Һинме был? Ә, нисә? Биш...

Графалар һәм цифрҙар менән биҙәлгән ҙур ҡағыҙ буйы оҙон ҡағыҙҙың «Пар һөрөү» тигән һүҙе аҫтына, Салауат исемендәге колхоз тураһына — биш һаны яҙылды. 10 май — пар һөрөүҙең һуңғы срогы ине. Ә был колхозда ни бары 5 гектар ғына пар күтәрелде.

Салауат исемендәге колхоз район өсөн характерле түгел, әлбиттә. Ул райондағы 105 колхоздың иң артта ҡалғандарының береһе. Ләкин колхоздарҙа пар һөрөүҙең торошо район өсөн типик факт булыуы менән ҡыҙыҡлы. Шаран районында 18 мең гектар урынына, тик 2.385 гектар ғына пар һөрелде.

Бер ай ваҡыт үтеп китте. Был арала трактор һәм йәнле тартыу көстәре өсөн пар һөрөүҙән башҡа бер эш тә ҡалманы. Ә шулай ҙа районда был эш һаман йәйелдерелмәй. «Үрнәк», «Дүртөйлө», Карл Маркс, Роза Люксембург исемендәге колхоздар хатта 15 июндә лә пар күтәреүҙе башламанылар. Шаран һәм Ерекле МТС-тарында күп кенә тракторҙар яҙғы сәсеүҙе үткәреү менән үк капиталь ремонтҡа туҡтанылар.

Колхоздарҙың һәм МТС-тарҙың, хатта район ауыл хужалығы бүлегенең етәкселәре яҙғы сәсеүҙе тамамлау менән «хәл йыйып алыуҙы» һаман дауам итәләр. Көсөргәнешле яҙғы баҫыу эштәренән һуң иҙелбегәне бушатмай, тынысланмай, пар һөрөүҙе йәйелдерергә кәрәк икәнлеген онотҡолар.

— Өлгөрөрбөҙ әле,—ти Салауат исемендәге колхоздың председателе иптәш Шакиров. — Сәсеүҙе, үҙган йылға ҡарағанда, күп элек бөттөк. Ваҡыт бар әле.

Был зарарлы тынысланыуҙың ни мәғәнәһыуҙың һөҙөмтәһе асыҡ. Шаран районында пар һөрөү планы 20 июнгә ни бары 27,8 процентҡа тиңә үтәлде.

Район ауыл хужалығы бүлеге мөдире Фәттахов, баш агроном Әрназаров иптәштәргә сәселәсәк ерҙәрҙең урожайын күтәреүгә йүнәлтелгән был мөһим эшкә серьез ҡарауҙы ҡарарға һәм оператив эшләй белергә күптән ваҡыт.

И. Абдуллин.

ШАРТЛЫ ТРАКТОРҒА 500 ГЕКТАР ЕР ЭШКӘРТЕЛДЕ

ЯНАУЫЛ. (Телефон аша). Байҡа МТС-ының иптәш Зиязов бригадаһы тракторҙарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыуҙың гүзәл өлгөһөн күрһәтә.

Бригада Молотов һәм Андреев исемендәге колхоздарҙы хеҙмәтләндерә. Договор бөтә эш төрҙәре буйынса ваҡытында үтәлә. Пар күтәреү ҙә 10 июнгә тулыһынса тамамланды. Бына ошолай ыңғышмалы эшләү һөҙөмтәһендә бында шартлы һәр бер тракторға 500 гектарҙан артыҡ ер эшкәртелде.

Иптәш Зиязов бригадаһы яҙғы сәсеүгә төшкәндән бирле район Советы һәм ВКП(б) райкомының күсмә Ҡыҙыл Байрағын үҙ ҡулында тота.

М. Фәтхов.

Темпты күтәрергә

Баҡалы районының 10 колхозы пар һөрөүҙе тамамланы. Хәҙер улар пландан тыш һөрәләр. Карл Маркс исемендәге колхоз 310 гектар урынына — 320, Сталин исемендәге колхоз 210 гектар урынына — 260 һәм «Үрнәк» колхозы 180 гектар урынына — 215 гектар пар күтәрҙе.

Ләкин районның башҡа колхоздарында эш аҡрын бара. «Новый мир» колхозы яҙғы сәсеүҙе 5 июнгә тамамлағайны. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, был колхоз 640 гектар урынына ни бары 25 гектар ғына ер һөрҙө. Колхозда Божор МТС-ының ике «НАТИ» һәм бер «У-2» тракторы эшләй һәм колхоздың 35 баш эш аты бар. Әгәр ҙә был көстәр тулыһынса файҙаланылһа, план күптән үтәлгән булыр ине. Ләкин колхоз председателе Сазановтың:

— Тракторҙарға техник тәрбиә үткәрелгәс, аттарҙан башҡа ла һөрәп бөтөрөрбөҙ, ваҡыт бар, — тип ҡарауы, пар һөрөү эшен һуҙыуға алып бара.

Ошондай уҡ хәлде Пушкин исемендәге колхозда ла осратырға мөмкин. Бында 18 эш атының 10-һы ғына пар һөрөү эшендә файҙаланыла. Һабансылар көндәлек нормаларын үтәмәйҙәр. Улар һәр көн 0,75 гектар урынына 0,15 — 0,25 гектар ғына ер һөрәләр. Һабансыларға айырым загондар беркетелмәгән, уларҙың бөтәһе бер урында эшләйҙәр. Эш көнө тулыһынса файҙаланылмай. Шуның һөҙөмтәһендә улар 5 көн эсендә 2 гектар ғына ер һөрҙөләр.

«1 Май», «Урал», «Победа» һәм «Ярыш» колхоздарында пар һөрөү бөтөнләй башланмаған әле.

Район Советы исполкомы колхоздарҙа пар күтәреү эшенең барышы менән ҡыҙыҡһынмай. Район ауыл хужалығы бүлеге етәкселәре ҡайһы колхозда күпме пар һөрөлөүен дә белмәйҙәр.

Х. Ғәлимов.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

МТС ниңә насар эшләй?

Ҡарламан МТС-ы Ҡырмыҫҡалы районының 28 колхозын хеҙмәтләндерә. Был хужалыҡтарҙың һәр ҡайныһы менән договор төҙөшөлгән. Шул нигеҙҙә МТС яҙ көнө 5.700 гектар ер һөрөргә, 3.300 гектар ашлыҡ сәсергә, 3.100 гектар майҙанда культивация һәм 5500 гектарҙа тырматыу эштәре үткәрергә тейеш ине. Ләкин был эш төрҙәре күләм яғынан да, шулай уҡ сифат һәм срок яғынан да МТС тарафынан күпселек колхоздарҙа үтәлмәне.

Тик 7 колхозда ғына договор срокә еткерелеп башҡарылды. Ҡайһы бер трактор бригадаларында сифат талаптарына бик насар иғтибар бирҙеләр. «Политотдел» колхозында иптәш Мостафин етәкселек иткән бригада 32 гектар майҙанды сей ҡалдырып һөрҙө, ер баштары һәм бороло йөрөгән урындар бөтөнләй эшкәртелмәне. «Урал», «Үрнәк», «Иҙел», «Берлек», Ғафури исемендәге колхоздарҙа ла бракҡа юл ҡуйылды.

Ни өсөн МТС договорҙы үтәмәне? Тракторҙар сиктән тыш насар файҙаланылдылар. Бына алдынғыларҙан һаналған иптәш Кәлимуллин бригадаһы. Төрлө сәбәптәр менән был бригадала — «СТЗ-НАТИ» тракторы 22 смена, «У-2» тракторы 24 смена простой яһаны. Һөҙөмтәлә ул хеҙмәтләндергән «Маркс» колхозы менән төҙөшкән договор һөрөү буйынса 68 процентҡа, сәсеү—54, культивациялау—52 процентҡа ғенә үтәлде. Башҡа бригадаларҙа тракторҙарҙың тик тороуы тағы ла күберәк булды.

МТС буйынса тик яҙғы сәсеү осоронда ғына тракторҙарҙың тик тороуҙары 200 сменанан артып китте, уларҙың 70—80 проценте техник сәбәптәр буйынса. Был сәбәптәр МТС етәкселәренең иғтибарҙарын трактор бригадаларына техник ярҙамды көсәйтеүгә йүнәлдерергә тейештәр ине. Ләкин был ярҙам булманы. Бригадаларҙың заказдары мастерскойҙа үҙ ваҡытында үтәлмәне, күсмә мастерскойҙың ошо көнгә тиклем ҡайһы бер трактор бригадаларында бер генә тапҡыр ҙа булғаны юҡ. Булған урындарҙа ла ул тейешле ярҙамды күрһәтмәне.

Договор үтәлмәүенең бөтә сәбәбе тракторҙарҙың ватылыуында ғына түгел, әлбәттә. Тәҙөк машиналар ҙа тейешенсә файҙаланылмаһылар. Мәҫәлән, «Иҙел» колхозында иптәш Маҡсутов эшләгән трактор ватылып та торманы, ләкин ул 7,60 гектар смена норма һәм 3—3,5 гектарға ғына үтап барҙы. «Берлек» колхозында иптәш Шәрипов бригадаһы «СТЗ-НАТИ» тракторы менәк сменаға 3—4 гектар ғына ер һөрҙө. Ғафури исемендәге колхозда да смена нормалары үтәлмәне, сөнки машиналарҙы тулы ҡеүәтендә файҙаланыу өсөн көрәш ойошторолманы.

Трактор бригадаларының насар эшләүенә колхоз етәкселәре тарафынан талаптың етерлек булмауы ла сәбәп булып тора. Улар договорҙың теүәл үтәлеүе өсөн көрәшмәйҙәр һәм колхоздар тарафынан эшләнергә тейеш булған шарттарҙы үтәмәйҙәр. «Политотдел» колхозында (председателе иптәш Ғәйнуллин) трактор бригадаһы өсөн вагончик тик исем өсөн генә төҙөлгән, уның башы ябылмаған, туҡланыу шарттары тыуҙырылмаған, һыу ваҡытында килтерелмәй.

Яҙғы сәсеү ваҡытындағы етешһеҙлектәр әле һаман дауам итә. Шуның арҡаһында пар һөрөү әҙәлдә. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы бөтә машина-трактор станциялары етәкселәренән трактор эштәренең планын бөтә эш төрҙәре буйынса теүәл үтәүҙе һәм агротехник ҡағиҙәләрҙе һаҡлауҙы талап итте. Яңы типовой договор буйынса трактор эштәре планының үтәлеүе өсөн колхоз етәкселәренә лә яуаплы бурыстар йөкмәтелә. Ләкин был талаптарҙы Ҡарламан МТС-ы етәкселәре лә, колхоз председателдәре лә үтәмәйҙәр. Бындай хәлгә артабан ҡаты сик ҡуйылырға тейеш.

И. Ғаббасов.

Республика колхоздарында пар һөрөү барышы

(План үтәлеше, 1948 йылдың 20 июненә, проценттарҙа)

1.	Туймазы	116
2.	Дәүләкән	92,9
3.	Янауыл	89,9
4.	Өфө	74,3
5.	Асҡын	72,8
6.	Мишкә	70,8
7.	Балтач	69,3
8.	Оло-Тиләк	68,5
9.	Покровка	68,3
10.	Благовещен	67,8
11.	Әлшәй	66,5
12.	Иглин	63,8
13.	Баҡалы	59,4
14.	Бөрө	57,4
15.	Байҡыбаш	57,2
16.	Салауат	56,7
17.	Бүздәк	55,1
18.	Ҡалтасы	53,9
19.	Ҡандра	53,9
20.	Стәрлетамаҡ	53,8
21.	Белоҡатай	50,7
22.	Шишмә	50,6
23.	Благовар	50,1
24.	Краснокамҡ	49,4
25.	Борай	49,1
26.	Белорет	47,4
27.	Ҡариҙел	45,6
28.	Архангель	44,8
29.	Шаран	44,6
30.	Иәрмәкәй	44,2
31.	Бөззәяз	43,5
32.	Нуриман	42,8
33.	Ҡыйғы	42,2
34.	Мәсетле	41,9
35.	Дыуан	40,0
36.	Илеш	40,0
37.	Саҡмағош	39,7
38.	Кушнаренко	38,6
39.	Учалы	38,5
40.	Маҡар	37,6
41.	Тәтешле	36,0
42.	Бәләбәй	34,4
43.	Бишбүләк	33,3
44.	Дүртөйлө	33,1
45.	Ҡырмыҫҡалы	32,9
46.	Әбйәлил	32,8
47.	Ғафури	32,0
48.	Баймаҡ	31,7
49.	Стәрлебаш	28,4
50.	Матрай	28,3
51.	Абзан	28,2
52.	Ауырғазы	28,1
53.	Миәкә	23,7
54.	Йомағужа	23,6
55.	Малаяз	21,3
56.	Федоровка	20,5
57.	Көйөргәҙе	20,1
58.	Күгәрсен	19,6
59.	Хәйбулла	15,4
60.	Воскресен	10,5
61.	Зианчура	7,6
62.	Бөрйән	4,7
63.	Йылайыр	3,0

План үтәлде

БАЙМАҠ. (Телеграф аша, Үҙ хәбәрсебеҙҙән). Йылайыр бөртөклө ашлыҡ совхозы коллективы пар һөрөүҙең государство планын үтәне. 4 мең гектар пар күтәрелде. Совхоздың алдынғы Октябрь бүлексәһе пландан тыш 100 гектар ер һөрҙө.

Совхоз работниктәре 16 июндә бесәнгә төштөләр. 300 гектар майҙандың бесәне сабылды һәм эҫкертләнде.

Иптәш В. С. Никитин металлургтарҙың 1-се номерлы һөнәрселек мәктәбен тамамлағандан һуң, Белорет металлургия заводында эшкә башланы. Ул айлыҡ норманы 150 процентҡа үтәй.

Һүрәттә: Ҡорос иретеүсе В. С. Никитин.

Л. Якубов фотоһы.

ФЗО мәктәптәренә һәм һөнәрселек училищеләренә призывты ойошҡан рәүештә үткәрергә

Государство хеҙмәт резервтәре системаһы работниктәре коллективтәренә айырыуса мөһим государство бурысы — социалистик промышленноете һәм транспортты квалификациялы кадрҙар, өҫтәмә эшсе көсө менән тәьмин итеү бурысы йөкмәтелгән.

Республиканың хеҙмәт резервтәре управленнеһе коллективтәре тарафынан был өлкәлә ҙур эштәр башҡарылды. Ағымдағы йылдың тәүге биш айында ғына промышленность предприятиеләренә 4492 кеше — квалификациялы йәш эшселәр әҙерләп бирелде.

Ошо йылдың июль айында һөнәрселек һәм тимер юл училищеләре квалификациялы 2520 йәш эшсе сығарасаҡ.

Төҙөлә торған яңы заводтар, торлаҡтар, фабрикалар, мәктәптәр, больницалар һәм башҡа объекттар өсөн генә түгел, бәлки бөтә халыҡ хужалығы тармаҡтары өсөн хәҙер йәйге сезондың хәл иткес айҙарына инде. 1948 йылдың беренсе яртыһындағы эштәргә йомғаҡ яһаласаҡ һәм йыллыҡ программаны Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһының 31 йыллығы көнөнә уңышлы үтәүҙе тәьмин итеүгә нигеҙ юлдар билдәләнәсәк. Бында беҙҙең хеҙмәт резервтәре работниктәре, управлениенән алып училищеләрҙең һәм мәктәптәрҙең һәр бер работнигe эшсе көстәре әҙерләүҙең государство планын юғары сифатлы итеп үтәүҙә бөтә көстәрен һәм энергияларын һалып эшләргә тейештәр.

СССР Министрҙәр Советының 1948 йыл 29 май һәм Башҡорт АССР-ы Министрҙәр Советының ошо йыл 11 июнь ҡарарҙары нигеҙендә республика күләмендә ФЗО мәктәптәренә һәм һөнәрселек, тимер юл училищеләренә наүбәттәге призыв үткәрелә. ФЗО мәктәптәренә призыв 15 июндән башланды инде, ул беренсе августа тиклем дауам итәсәк. Ә һөнәрселек училищеләре өсөн призывтың срогы—20 июндән 25 августҡа тиклем. Билдәләнгән был сроктарҙа ФЗО мәктәптәренә 6.200 кеше, һөнәрселек, тимер юл училищеләренә 3000 кеше саҡырыласаҡ. Шулар эсенән Кемерово өлкәһендәге ФЗО мәктәптәре өсөн 3500 кеше, Приморье крайы һәм Иркутск өлкәһе өсөн 500-әр кеше бирергә, республиканың хеҙмәт резервтәре уҡыу йорттарына — ФЗО мәктәптәренә 1700 һәм һөнәрселек училищеләренә 3 мең кеше саҡырырға тейешбеҙ.

Наүбәттәге призывтың уңышлы үткәрелеүе башлыса район, ҡала Советтәре исполкомдарының эшмәкәрлеге менән хәл ителәсәк.

ФЗО мәктәптәренә, училищеләргә — хеҙмәт резервтәренең уҡыу йорттарына йәштәрҙе саҡырыуҙа һәм кадрҙар етештереүҙә Ленин комсомолы ҙур булышлыҡ итеп килә. ВЛКСМ-дың ҡала, район комитеттәре, шулай уҡ тәүге комсомол ойошмалары был эштәр быйыл да үҙҙәренең туранан-тура актив ҡатнашыуҙары менән ярҙам күрһәтерҙәр тип ышанырға кәрәк.

Партия һәм Совет Хөкүмәте, бөйөк юлбашсыбыҙ иптәш Сталин хеҙмәт резервтәре уҡыу йорттарының уҡыусылары тураһында көндәлек рәүештә хәстәрлек күрәләр. Уҡыусылар государство иҫәбенән түләүһеҙ уҡыу менән бер рәттән, өҫ һәм аяҡ кейемдәре, туҡланыу, торлаҡ менән тәьмин ителәләр. Мәктәпте һәм училищене тамамлағас һәр бер уҡыусыға теләгә булғанда артабан юғары уҡыу йорттарында уҡырға тулы хоҡуҡ бирелә. Колхоздарҙа, поселкаларҙа, ҡалаларҙа йәштәргә был хәстәрлектәрҙе киң аңлатырға кәрәк.

ФЗО мәктәптәренә һәм һөнәрселек училищеләренә наүбәттәге призывты ойошҡан рәүештә, уңышлы итеп үтәүҙе тәьмин итәйек!

А. Абдуллин,
Хеҙмәт резервтәре Министрлығының республикан управленнеһе начальнигы.

АҠШ-та президент һайлауға ҡарата

(Нью-Йорктан хат)

АҠШ-та президент һайлауға арты йылға яҡын ваҡыт ҡалһа ла, [illegible]

[illegible]

беләләр: «Уның буйы алтмыш һигеҙ дюйм, күҙҙәре һоро, ауырлығы 165 англо-фунт». [illegible]

[illegible]

системабыҙҙың гәжәп үҙенсәлектәре бар. Миллиондарса һайлаусылар тауыш биреүҙә ҡатнаша алмайҙар. Конгресс членҙарының күпселеге үҙенең һайлау кампанияһы расходтарын түләй алмай [illegible]

[illegible]

наттың ваҡытлы председателе Артур Ванденбергте, Калифорния штаты губернаторы Уорренде һәм вәкилдәр палатаһы спикере (председателе) Мартинде күрһәтәләр.

Висконсин һәм Небраска штат- [illegible]

[illegible]

тышҡы политикаһы авторҙарының береһе булған Джон Даллестең телмәрҙәрен уҡырға кәрәк, тип йыш ҡына һайлайҙар. Даллес Рокфеллерҙәрҙең «Чейз Нэйшнл Бэнк» менән, [illegible]

[illegible]

теп сараһы булып торған халыҡ-ара ойошма яҡлы, тип иғлан итте. Бына шуның өсөн дә Стассен 1945 йылдың апрелендә Рузвельт тарафынан Сан-Францискола Берләшкән милләттәр ойошмаһының [illegible]

[illegible]

(Аҙағы 4-се биттә).

Германиялағы Совет хәрби администрацияһының немец халкына мөрәжәғәте

БЕРЛИН, 19 июнь (ТАСС). Германиялағы Совет хәрби администрацияһы немец халкына мөрәжәғәт иглан итте. Мөрәжәғәттә былай тип әйтелә:

Германияның граждандары һәм гражданкалары!

Германияның оккупацияланған көнбайыш зоналарында сепаратный аҡса реформаһы иглан ителгән. Унда Америка, Британия һәм Француз оккупацион властарҙарының бойороғо менән берҙәм герман аҡсаһы — рейхсмаркалар әйләнештән алына һәм айырым аҡса индерелә. Хәҙер Германияла берҙәм государство аҡсаһы һәм берҙәм аҡса йөрөшө булмаясаҡ. Был, герман халкының теләгенә һәм интерестәренә ҡапма-ҡаршы рәүештә эшләнә. Аҡса реформаһы Германияны бүлгеләп, уның экономикаһын үҙҙәренә буйһондороп, Германияны көсһеҙләндерергә тырышыусы Америка, Британия һәм Франция монополияларының интерестәрендә, сепаратный юл менән үткәрелә.

Германияның государство берҙәмлегенә яңы серьез удар яһалды. Контроль механизм тураһындағы килешеүҙәр һәм Потсдам килешеүҙәре боҙолдо, улар Германия менән, бер бөтөн ил кеүек мөнәсәбәт итеүҙе һәм аҡса йөрөшөндәге берҙәмлекте һаҡлау кәрәклеген күҙҙә тоталар ине.

Германияның көнбайыштағы оккупацияланған өс зонаһында үткәрелә торған финанс реформаһы Германияны бүлгеләүҙе тамамлай. Сепаратный аҡса реформаһын ойоштороусылар яуаплылыҡтан һәм герман халкының асыуынан ҡурҡып, дөйөм Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреү, [illegible] реформаһын аҡларға маташалар. Был айырым сығарыусыларҙың маҡсаты — общественное фекерен алдауға.

Дүрт яҡлап килешеү нигеҙендә дөйөм Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреү бик мөмкин була торған һәм кәрәкле ине. Совет Хөкүмәте [illegible] ярашлы рәүештә эш итеүсе Германиялағы совет хәрби администрацияһы һәр ваҡыт Германияның политик һәм экономик берҙәмлеген һаҡлау яғында булды. Германияны бүлгеләүгә, [illegible] сепаратный эштәргә ул һәр ваҡыт ҡаршы сыҡты. Контроль советтың органдарында Советтәр Союзының вәкилдәре бөтә Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреү тураһында килешеүгә өлгәшеү өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаландылар. Шуның менән бергә, Совет вәкилдәре, реформаны тормошҡа ашырыуҙа һәм үҙ илдәрен экономик яктан аяҡҡа баҫтырыу өсөн ныҡлы аҡса тәьмин итеүҙә немецтәр үҙҙәре ҡатнашһындар өсөн, Германияның дөйөм финанс департаментен һәм немецтәрҙең үҙәк эмиссион банкыһын, һис кисекмәҫтән, төҙөүҙе талап иттеләр.

Советтәр Союзының контроль советтағы вәкилдәре Германияның айырым зоналарында сепаратный финанс реформаһын әҙерләүҙе ғәйепләргә тәкдим иттеләр. Дөйөм Германия өсөн аҡса реформаһы үткәреүҙең төп принциптәре буйынса дүрт яҡлап килешеүгә өлгәшелгәйне инде. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, дөйөм Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы өҙөлөп ҡалды.

Америка, Британия һәм Франция вәкилдәренең контроль советта дөйөм Германия өсөн аҡса реформаһы тураһында формаль ғенә дискуссия алып барғанлыҡтары, сепаратный аҡса реформаһына әҙерлекте йәшерен рәүештә алып барыу өсөн был дискуссияны файҙаланғанлыҡтары хәҙер асыҡ.

Сепаратный аҡса реформаһын шулай уҡ Германияның көнбайыштағы оккупацияланған зоналарында национал-социализм тарафынан боҙолған аҡса йөрөшөн тәртипкә килтереү кәрәклегенә һылтанып аҡларға маташалар.

Ләкин Германияның көнбайышындағы оккупацияланған зоналарында оккупацион властар аҡса йөрөшөн тәртипкә килтереү сараларын үткәреүгә өс йыл буйына фактик рәүештә тотҡарлыҡ итеп килделәр. Таркатылған аҡса йөрөшөн, Германия экономикаһын Америка, Англия һәм Франция монополиялары интерестәренә [illegible] файҙаланалар. Көнбайыш зоналарҙа эре капиталистар һәм спекулянттар тарафынан хәрби постановкаларҙан һәм спекуляциянан йыйылған ғәйәт ҙур аҡсалар [illegible] ҡалды.

Көнбайыш зоналарҙа немецтәрҙең банк һәм промышленность монополиялары һаҡланып ҡалған, уларҙың күбеһе хәҙер фактик рәүештә Уолл-Стрит филиалдарына, йәғни Американың банк һәм промышленность монополияларының филиалдарына әйләнгәндәр.

Америка, Англия һәм Франция монополиялары Германияны бүлгеләү политикаһын алып барып, Германияның көнбайышындағы оккупацияланған зоналарҙа Германияның эре капиталы һәм юнкерствоһы вәкилдәренә таяналар. Был капиталистар һәм юнкерҙар үҙ ваҡытында фашизмдың власть башына килеүен тәьмин иттеләр, икенсе бөтә донъя һуғышын әҙерләгәндәр һәм башлап ебәргәндәр. Сепаратный аҡса реформаһы хеҙмәтсән халыҡ интерестәренә зарар килтерә, көнбайыш Германияла был реакцион круглар[illegible] политик һәм экономик позицияларын көсәйтә.

Көнбайыш Германияла төҙөлгән һәм үҙҙәрен немец халкының вәкилдәре тип атаған бизония һәм тризония органдары, фактылар күрһәткәнсә, Англия, Америка һәм Франция монополияларының ҡулында марионеткалар булып торалар.

Сепаратный аҡса реформаһы Германияның экономик яктан аяҡҡа баҫтырыу эшенә серьез зыян килтерә. Берҙәм герман аҡсаһы урынына ике төрлө аҡса индерелә. Берҙәм хаҡтар урынына — ике төрлө хаҡ. Илдең эсендә сауҙа бәйләнештәре боҙола. Зоналар ара сауҙа, төрлө аҡсалар булғанлыҡтан, фактик рәүештә төрлө государстволар араһындағы сауҙаға әйләнә. Көнбайыш Германия аҡсаһы хатта Германияның [illegible] Америка доллары контроле аҫтына эләгә, ә Америка монополистары [illegible] Германияның [illegible].

Германияның көнбайыш оккупация зоналарындағы аҡса реформаһы Германияның айырым өлештәре араһында [illegible]. Ул реформа Германияның [illegible].

Быны шуға күрә лә немец хужалыҡ интерестәрендә [illegible] сепаратный аҡса реформаһын аҡларға тырышыуҙар ялған булып тора.

Германияла Совет хәрби администрацияһы Потсдам ҡарарҙары нигеҙендә һәм немец халкы интерестәрендә Германияның тыныс экономикаһының үҫешен тәьмин итергә ынтылып, дөйөм Германияла аҡса реформаһын үткәреүгә тырышты. Совет хәрби администрацияһы Германияның политик һәм экономик берҙәмлеген әлеккесә яҡлай, сепаратный аҡса реформаһы үткәреүҙә Америка, Британия һәм Франция оккупацион властарҙарының хәрәкәттәре [illegible] бөтә яуаплылыҡты улар өҫтөнә йөкмәтә.

Килеп тыуған хәлдә иҫкә алып, Германиялағы Совет хәрби администрацияһы түбәндәгеләрҙе белдерә:

1. Германияның көнбайыш оккупацион зоналарында сығарылған аҡсалар Германиялағы совет оккупацион зонаһында һәм Германиялағы совет оккупацион зонаһында урынлашҡан Берлинда йөрөтелмәйәсәк.

2. Совет хәрби администрацияһы шуны белдерә: совет оккупацион зонаһына һәм Берлин районына көнбайыш оккупацион зоналарҙа сығарылған яңы аҡсалар, шулай уҡ рейхсмаркалар, рентмаркалар һәм [illegible].

3. Көнбайыш Германияла сығарылған яңы аҡсаларҙы, һәм шулай уҡ рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы [illegible] совет хәрби командованиеһынан [illegible].

Был положение закон көсөнә инеп тора [illegible].

Германиялағы совет оккупацион [illegible].

Германиялағы совет хәрби администрацияһы немец халкы [illegible].

Германияла Совет хәрби администрацияһы башлығы — Германиялағы совет хәрби оккупацион ғәскәрҙәренең Баш командующийы Советтәр Союзы маршалы В. Соколовский.

Берлин, 19 июнь 1948 йыл.

Грецияға һәм Төркиәгә „ярҙам итеү“ тураһында Трумэндең конгреска өсөнсө докламы

ВАШИНГТОН, 19 июнь (ТАСС). Аҡ Йорт президент Трумэн тарафынан бирелгән «Грецияға һәм Төркиәгә ярҙам тураһында өсөнсө докладты» матбуғатта иглан итеү өсөн тапшырҙы. Был докладта Трумэн былай тип белдерә: Грециялағы хәл «ауыр көйөнсә ҡала» һәм Американың һаман дауам иткән хәрби ярҙамы «партизандарҙың ҡаршылығын йомшартыр», тип ышаныс белдерә.

Төркиәлә программа тайпылышһыҙ рәүештә үтәлә, тип әйтелә, докладта.

«Хәрби ярҙамдың үтәлеше» тигән бүлектә ошолай тип күрһәтелә: Ҡушма штаттар Грецияның король ғәскәрҙәренә 15 мең тонна күләмендә артиллерия-техник ҡоралдар, 2.800 автомашина, 75 мең дана мылтыҡ һәм күп һанда самолеттар ебәрҙе. Грецияның хәрби-диңгеҙ флоты 6 яңы кононер кәмәһе һәм материалдар алды. Ләкин докладта Греция короле ғәскәрҙәренең ниндәйҙә булһа мөһим уңыштары күрһәтелмәй, тик Олимпа райондарындағы һуғыш ҡына күрһәтелә. Был һуғыш ваҡытында бер мең партизан үлтерелде йәки пленға алынды тип раҫлана.

Докладта «дөйөм хәлдең нык булмауы һәм билдәһеҙ булыуы Грецияны экономик яктан аяҡҡа баҫтырыуҙы һаман туктатып тора» тип таныла.

Докладта аҡсаның ҡиммәте түбәнәйеүе тураһында статистик мәғлүмәттәр килтерелә.

Докладтың Төркиәгә «ярҙам» тигән ҡыҫҡа бүлегендә түбәндәгесә әйтелә: 1 мартҡа тиклем Төркиәгә ебәрелергә билдәләнгән 300 мең тонна урынына 30 мең тонна ғына нәмә ебәрелде. Ләкин май айынан сентябргә тиклем, ай һайын, уртаса 40-50 мең тонна ебәреләсәк.

АҠШ-та президент һайлауға ҡарата

(Аҙағы. Башы 3-сө биттә).

Республикасыларҙың дүртенсе кандидаты Ванденбергтен эшмәкәрлеге шуның менән характерлана — ул «Маршалл планының» конгресс тарафынан ҡабул ителеүендә билдәле роль уйнаны.

Һайлау алды кампанияһы демократик партияла аҙыраҡ активлек менән үтә.

Америка матбуғатының белдереүҙәренә ҡарап хөкөм иткәндә, демократик партия круттарында Трумэн кандидатураһы һайлаусылар араһында энтузиазм тыуҙырмай, һәм хәҙер уның һайланыуына ышаныс бик түбән тип асыҡтан-асыҡ танийҙар.

Америка матбуғатында ҡатмарлы йәшерен комбинациялар әҙерләнеүе тураһында ныҡышмалы рәүештә һүҙ йөрөтәләр, уның һөҙөмтәһендә Трумэн үҙ урынын генерал Эйзенхауэрға бирергә тейеш буласаҡ.

Газеталарҙа демократик партия етәкселегендә Трумэнгә ҡаршы бунт әҙерләнеүе тураһында хәбәрҙәр сыҡты. Матбуғат, 12 июлдә Филадельфияла буласаҡ съезд алдынан Трумэнгә ультиматум ҡуйыласаҡ — уға йәки «хөрмәтле рәүештә» китергә тура киләсәк, йәки ул съезд тарафынан һайланмаясаҡ, тип раҫлай. Хатта шундай фекер ҙә булды — Трумэн үҙ кандидатураһын кире алыу тураһында белдереп, съезға Эйзенхауэр кандидатураһын тәкдим итәсәк. Был фекерҙәр аҡланырмы, юҡмы, уныһын киләсәк күрһәтер.

Демократик һәм республикан партияларҙа һайлау алды кампанияһы, бер ни тиклем тыныс конкуренция обстановкаһында бара. Шул уҡ ваҡытта илдә прогрессив хәрәкәтте йәйелдереүгә ҡаршылыҡ күрһәтергә ынтылыусы реакцион коалицияға ҡаршы Генри Уоллестең яңы партияһына көсөркәнешле көрәш алып барырға тура килә.

Күптән түгел «Нью Рипаблик» журналының хәбәр итеүенә ҡарағанда, Төньяҡ Каролина штатында бойондороҡһоҙ кандидаттарҙы регистрациялау өсөн 10.000 подпись ҡуйылған петиция талап ителә, ә штаттың властәре петицияға ҡуйылған һәр бер подпись өсөн налог һалғандар. Оклахома штатында полиция өсөнсө партия ойошмаларының 10 апрелдә Чикагола булған кәңәшмәһенә делегаттарҙы ебәрмәҫкә маташты. Эвансвиллда (Индиана штаты) урындағы колледж дирекцияһы дин ғалиме һәм философия профессоры доктор Дж. Паркерҙе, ул Уоллес телмәр менән сығыш яһаған митингыла председателлек иткән өсөн, эштән сығарған. Питсбургта (Пенсильвания штаты) бер газета, Уоллесте яҡлаусы һайлаусыларҙы ҡурҡытырға тырышып, Уоллесте яҡлаусы кандидаттарҙы регистрациялау тураһындағы петицияға үҙ подписьтәрен ҡуйыусыларҙың исемдәрен көн һайын үҙенең беренсе биттәренә баҫып сығара.

Былар һәм ундарса башҡа фактылар реакцияның прогрессив хәрәкәтте быуырға теләүен күрһәтәләр. Ләкин быларҙың бөтәһе ла Уоллес яҡлыларҙың энергияһын арттыралар ғына. Калифорния, Нью-Йорк, Пенсильвания, Нью-Джерси штаттарында яңы партияның кандидатлыҡ исемлектәре регистрацияланған инде. «Нью Рипаблик» журналының хәбәр итеүенә ҡарағанда, яңы партияның исемлектәре 48 штаттың 46-һында регистрациялауға әҙерләнгән. Яңы партияның һайлау алды кампанияһында негрҙар общественное актив ҡатнаша. Негрҙарҙы иҙеү бик көслө булған Алабама штатында прогрессив партия төҙөлгән, ул Уоллес партияһына инә. Яңы партиянан конгреска кандидаттар араһында, төньяҡ, шулай уҡ көньяҡ штаттарҙа ла негр общественный деятельдәренән күренекле кешеләр күп.

Уоллес партияһы Американың массовый прогрессив партияһы булып бара.

«Бынан бер нисә ай ғына элек башланған беҙҙең хәрәкәтебеҙ, — тип яҙҙы Генри Уоллес 3 майҙа» «Нью Рипаблик» журналында. — хәҙер шундай ҡолас алды, илдә ул серьез политик көскә әйләнде. Беҙ аҙсылыҡ түгел инде».

Генри Уоллестең өсөнсө партияһының популярлеге үҫеүе конгресстәге ике партиялы реакцион коалицияны серьез рәүештә тынысһыҙландыра. Америкаға ҡаршы эшмәкәрлекте тикшереү буйынса комиссия (күпселек американылар был комиссияны Америкаға ҡаршы комиссия тип атайҙар) прогрессив ойошмаларға ҡаршы йүнәлтелгән махсус Мунд закон проектын әҙерләне. Тыштан ҡарағанда был закон проекты коммунистик партияға ҡаршы йүнәлтелгән булһа ла, уның айырым статьялары был закон проектына теләһә ниндәй прогрессив ойошманы һәм, шул иҫәптән, өсөнсө партияны ла «индерергә» мөмкинлек бирә.

Көстәрҙең урынлашыуы һәм уларҙың сағыштырмаһы бик нык үҙгәреүе мөмкин әле. Ләкин был кампанияла төп һыҙыҡтар билдәләнгән инде. Унда прогресс һәм тыныслыҡ көстәре, граждандлыҡ азатлыҡтарын һәм ил эсендәге һәр төрлө прогрессив хәрәкәтте баҫырға ынтылыусы реакция көстәренә ҡаршы көсөркәнешле көрәш алып баралар.

В. Морев.

19-20 июнда Өфөлә, республиканың беренселеге өсөн, Өфө—Черниковск ҡалалары араһында физкультурниктарҙың велосипед ярышы үткәрелде.

Һүрәттә: Старт майҙанында, уҙышта ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙан бер төркөм.

М. Әхмәтьянов фотоһы.

Пионерҙәр утауҙа

Күгәрсен районы, Сурабай башланғыс мәктәбе уҡыусылары уҡыу йылы бөтөү менән «Комсомол» колхозы баҫыуына эшкә сығырға булғайнылар. Ләкин, вожатыйҙары уҡытыусы иптәш Янбаева педучилищеға һынауҙар тапшырырға китеү сәбәпле, етәксеһеҙ ҡалдылар. Пионерҙар аптырамаңылар. Араларынан иң яҡшы уҡыусыларҙан Гәлиәт Төхбәтуллина, Фәриҙә Яхина, Фәниә Хәбибуллина, Клара Төхбәтуллиналарҙы етәксе итеп һайланылар ҙа, звеноларға бүленеп утауға сыҡтылар. Звенолар араһында ярыш башланды. Һәр звено иртәрәк сығып, башҡаларына ҡарағанда, күберәк утарға тырыша.

Һөҙөмтәлә, бөгөнгә көнгә пионерҙәр 17 гектар арыш һәм 15 гектар бойҙайҙы ҡый үләндәренән таҙарттылар. Йәш патриоттар эштәрен шул уҡ темп менән дауам итәләр.

М. Хәлило[illegible]

Етәксе работниктәрҙе һәм специалистәрҙе аттестациялау

ССР Союзы әҙерләүҙәр Министерствоһы ошо системала эшләгән кадрҙарҙы өйрәнеү, уларҙың идея-политик белемдәрен артабан күтәреү маҡсатында республика күләмендә эшләгән бөтә етәксе работниктәргә, специалистарға аттестация үткәрә.

СССР әҙерләүҙәр Министерствоһының Башҡортостан буйынса уполномоченныйы эргәһендәге, заготживсырьеның, главзаготсортзерноның республикан конторалары эргәһендәге аттестация комиссиялар район работниктарына аттестация үткәреү эшенә тотондолар.

Етәксе работниктәргә үткәрелгән был аттестация әҙерләүҙәр Министерствоһы эшен артабан яҡшыртыуҙа, шулай уҡ был системала эшләгән кадрҙарҙы етәксе урындарға дөрөҫ урынлаштырыуҙа һәм тәрбиәләүҙә мөһим сара булып тора.

Колхоз мастерскойы

Ғафури районында «Йондоҙ» колхозы хужалыҡ кәрәктәре етештереү буйынса үҙ мастерскойын булдырҙы. Был мастерскойҙың столярный, тәгәрмәс һәм сана яһай торған цехтары бар. Мастерҙар бөтәһе лә колхоздың үҙ члендәре. Улар ағымдағы йылда колхозға 40 сана, 60 стан тәгәрмәс, умартасылыҡ фермаһы өсөн 65 ладан, шулай уҡ 4 елгәрәк [illegible] шина эшләп бирҙеләр.

— Беҙҙең колхоз үҙенә [illegible] ҙа хужалыҡ кәрәктәрен [illegible] алыуға меңәрләгән һум аҡса [illegible] торғайны. Хәҙер бөтәһен дә [illegible] сифатлы итеп үҙ мастерскойыбыҙ эшләй. Аҡсаға экономия [illegible] ти колхоз председателе иптәш [illegible] Кадиев.

Эшселәрҙең балаларына ял

Черниковск ҡалаһы заводтары эшселәрҙең балаларын йәй көндәрендә күңелле ял иттереү өсөн яҙҙан уҡ тейешле саралар күрҙеләр. Төҙөләш тресы быйыл яңы пионер лагеры асты. Унда 1 июлдән башлап һәр сменала 100 бала ял итәсәк.

Нефть эшкәртеү заводы завкомы предприятие ҡарамағында булған балалар ял йорттарына ремонт үткәрҙе. Был ял йорттарында заводтың эшселәре, инженер-техник работниктәре балалары май айынан уҡ ял итә башланылар.

Уҡытыусылар өсөн торлаҡтар

Быйыл республика мәктәптәре эргәһендә уҡытыусылар өсөн торлаҡтар һалына башлай. Был торлаҡтарҙа уҡытыусылар ғына торасаҡтар. Уларҙы төҙөү өсөн хөкүмәт 17 миллион һумдан артыҡ аҡса бүлде. Был аҡсаға бер квартиралы 1250 торлаҡ һалынасаҡ.

250 торлаҡ ошо йылдың аҙағында һалынып бөтәсәк, ҡалған мең йортто төҙөү 1949—1950 йылдарҙа тамамланасаҡ.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАИРОВ.

СССР ХАЛҠ ХУЖАЛЫҒЫН АЯҠҠА БАҪТЫРЫУ һӘМ ҮҪТЕРЕҮҘЕҢ ИКЕНСЕ ГОСУДАРСТВО ЗАЕМЫ ПОДПИСЧИКТӘРЕ ИҒТИБАРЫНА!

СССР халҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереүҙең Икенсе государство заемының беренсе отош тиражын үткәреү срогы ССР Союзы финанс Министерствоһы тарафынан 1948 йылдың 26 июненән 3 августка күсерелде.

Үҙҙәренең облигацияларын әлегә тиклем алмаған подписчиктар облигацияларҙы алыу өсөн үҙҙәре заем взносы түләгән район йәки үҙәк һаҡлыҡ кассаһына мөрәжәғәт итергә тейештәр. Облигацияларын алмаған подписчиктар отош тиражында ҡатнашмаясаҡтар.

Башҡорт АССР-ы Государство һаҡлыҡ кассалары һәм Госкредит Управлениеһе.

БӘХЕТҺЕҘЛЕККӘ ОСРАУ ВАҠИҒАҺЫНАН СТРАХОВАТЬ ИТЕЛЕҮ
(врачтар таныҡмаһынан башҡа)

16—70 йәштәге кешеләр, бер йылдан алып 5 йылға тиклем срокка, үҙҙәрен страховать итә алалар. Теләгән суммаға страховать ителергә мөмкин. Страховой взностары: йылға 1000 һум страховой суммаһан, страховать ителеүсенең профессияһына (эшенә) ҡарата 2 һум 50 тиндән алып, 5, 8 йәки 12 һумға тиклем етә.

3 йылға, йәки унан да артыҡ срокка, страховать ителгән хәлдә, страхование взностарына 5, 10, 15 процент ташлама яһала.

Шуның өсөн, страхование төрөнә ҡарап, Госстрах страховой сумманы страховать ителеүсегә, тик бәхетһеҙлеккә осрап үлгән, йәки бөтөнләйгә эшкә һәләтлеген юғалтҡан хәлдә генә түләй.

Белешмәләр алыу өсөн һәм страховать ителеү өсөн госстрах инспекцияһына, йәки страховой агентка мөрәжәғәт итергә мөмкин.

Башгосстрах.

«Башкоопинсоюз» аппаратында эшләү өсөн бухгалтер-ревизорҙар һәм экономистар кәрәк. Эш шарттары килешеү буйынса.

Мөрәжәғәт итеү өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Киров урамы 15-се йорт.

Башкоопинсоюз.

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П 00184 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙары, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 125
25
июнь
йома

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

БАССР Министрҙар Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында. (1-се бит).
Урожай йыйнауға өлгөлө әҙерләнергә. (1-се бит).
Йыллыҡ планды — 7 ноябргә үтәйек! (1-се бит).
ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты Пленумы. Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауға һәм иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында. (2—3-сө биттәр).
Иптәш П. И. Каменев доклады буйынса фекер алышыуҙар. (3-сө бит).
Һигеҙ государствоның Сит ил Эштәре Министрҙарының Варшавалағы кәнәшмәһе. (4-се бит).
В. М. Молотовтың Варшаваға килеүе. (4-се бит).
Генерал Клейгә маршал Соколовскийҙың хаттары. (4-се бит).
Төркиә мәжлесендә. (4-се бит).

Иптәш Сталинга биргән вәғәҙәләрҙе большевиктарса үтәргә

Күптән түгел генә булып үткән ВКП(б) Өлкә Комитетенең икенсе пленумы республикабыҙ колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтарын һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауҙа, иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстарын тикшерҙе. Пленум көндөң был мөһим мәсьәләһе буйынса тейешле ҡарар ҡабул итте.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын эҙмә-эҙ тормошҡа ашыра барып, Башҡортостан колхоздары һәм совхоздары ауыл хужалығын күтәреүҙә быйыл тағы ла бер аҙым алға атланылар. Республикала яҙғы сәсеү уҙған йылға ҡарағанда яҡшыраҡ, ҡыҫҡа агротехник сроктарҙа үтте, колхоздар бөртөклө ашлыҡ культуралары иҫәбенә сәсеү майҙандарының структураһын ныҡ яҡшырттылар. Беҙ бойҙай сәсеү майҙанын уҙған йылға ҡарағанда икеләтә арттырҙыҡ һәм хәҙер арыш менән бойҙай бөтә бөртөклө ашлыҡ сәсеүлектәренең 70 процентен тәшкил итә.

Ләкин беҙ яҙғы сәсеүҙе уңышлы башҡара алманыҡ. Сәсеү планы тулыһынса үтәлмәне һәм ул бик һуҙылатылды. Ни өсөн һуң шулай булды?

Республиканың күп кенә райондары сәсеү планын үтәүҙә бик артта ҡалдылар. Бындай райондар иҫәбенә Архангель, Ишмәкәй, Зианчура, Илеш, Күгәрсен һәм Көйөргәҙе райондары инәләр. Сөнки был райондарҙың партия һәм совет ойошмалары сәсеү эше менән йомшаҡ етәкселек иттеләр, колхозсылар массаһын юғары урожай өсөн көрәшкә насар күтәрҙеләр, агитацион-массовый эштең әһәмиәтен баһалап еткермәнеләр.

Машина-трактор станциялары, яҙғы эштәр планын 10 июнгә артығы менән үтәнеләр ҙә, бик күп МТС-тар колхоздар менән төҙөлгән договорҙарҙа билдәләнгән сроктарҙа эштәрен башҡара алманылар. Ә 34 МТС яҙғы эштәр планын бөтөнләй үтәмәне. Был күңелһеҙ хәл тракторҙар паркының етештереүсәнлеге түбән булыуҙан килеп сыҡты. Сөнки күп МТС-тарҙа тракторҙарҙың тик тороуына юл ҡуйылды, төнгө сменала эшләү ойошторолманы, хеҙмәт дисциплинаһы насар булды һәм трактор бригадаларын техник яҡтан насар хеҙмәтләнделәр.

Хәҙер Башҡортостан партия ойошмаларының бурысы ауыл хужалығы эштәрендә етәкселектә етешһеҙлектәрҙе ныҡлап бөтөрөүҙән, ирешелгән уңыштарҙы нығытыуҙан һәм юғары урожай алыу өсөн көрәште ныҡ көсәйтеүҙән тора.

Сәсеүлектәрҙе үҙ ваҡытында һәм өлгөлө тәрбиәләү юғары урожай өсөн көрәштә мөһим этабы һанала. Шуға ҡарамаҫтан, республикала бөртөклө ашлыҡ культуралары майҙанының 46 процентына ғына утаған. Был өлкәлә бигерәк тә Хәйбулла, Учалы һәм Шаран райондары артта ҡалалар. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәрен хәҙерҙән үк бөтә яҡлап йәйелдерергә кәрәк. Партия һәм совет ойошмалары, сәсеүлектәрҙе өлгөлө тәрбиәләү өсөн колхоздарҙағы һәм совхоздарҙағы бөтә эшселәрҙе ылыҡтырырға, сәсеүлектәрҙе ашламалау эшен урындағы һәм минерал ашламаларҙы киң ҡулланыуҙы, ауыл хужалыҡ культураларын ҡоротҡостарына ҡаршы бөтә урындарҙа ла аяуһыҙ көрәшеүҙе, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа ашлыҡ культураларын һуғарыуҙы ойоштороуҙы тәьмин итергә тейештәр.

Хәҙер республикала социалистик малсылыҡ өсөн аҙыҡ әҙерләп ҡуйыуҙың иң яуаплы ваҡыты. Беҙгә быйыл бер миллион гектарға яҡын бесән сабырға һәм йыйырға, 670 мең тонна үлән силосларға кәрәк. Шуға ҡарамаҫтан, колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бесән сабыу һәм мал аҙығы силослау эше бик аҡрын бара әле. Был юл ҡуйғыһыҙ хәл. Бесән әҙерләү һәм силослау планын үтәү һәм арттырып үтәү өсөн колхоздарҙағы бөтә мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк.

ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарына ярашлы рәүештә беҙ пар һөреүҙе 10 июнгә тамамларға тейеш инек. Ә беҙ 20 июнгә пар һөреү планын бары тик 47 процентҡа ғенә үтәнек. Артабан пар һөреүҙе һуҙыу мөмкин түгел. Ул парҙың ҡиммәтен түбәнәйтә. Шуның өсөн беҙгә бөгөндән үк тракторҙарҙы ғына түгел, эш аттарының һәм үгеҙҙәрҙең күпселек өлөшөн ылыҡтырып, пар һөреү планын иң яҡын көндәрҙә үтәп сығырға кәрәк.

Республика колхоздары һәм совхоздары хәҙер урожай йыйнау алдында торалар. Быйыл беҙгә уҙған йылға ҡарағанда бөртөклө ашлыҡ культураларын 574 мең гектарға артыҡ йыйнап алырға тура килә. Ашлыҡтарҙың тиҙ өлгөрә барыуы уларҙы йыйнап алыуға әҙерләнеү срогын байтаҡ ҡыҫҡарта. Шуның өсөн бөтә партия һәм совет ойошмалары урып-йыйнауға әҙерлекте тиҙерәк тамамлау бурысы ... 20 июнгә алынған мәғлүмәттәр буйынса комбайндарҙы ремонтлау планы ни бары 47,3 процентҡа ғына үтәлде. Колхоздарҙың урып-йыйыу машиналарын ремонтлау менән дә шундай уҡ хәл. Яңы ашлыҡ һарайҙары төҙөү һәм иҫкеләрен ремонтлау, ... эштәре ла ... аҡрын бара. Был фактылар бөтәһе лә партияның район комитеттәренең ашлыҡ йыйнауға йомшаҡ етәкселек итеүҙәре тураһында һөйләйҙәр. Беҙгә иң яҡын көндәрҙә урып-йыйнауға әҙерлекте тамамларға кәрәк.

Партия һәм Совет Хөкүмәте ауыл хужалығын күтәреү буйынса эшселәр иген әҙерләүҙе иң мөһим бурыс итеп ҡарап баһалаясаҡ. Государствоға иген тапшырыу — үҙ бөтә партия, совет ойошмаларының, бөтә игенселәрҙең эше тел йомғаҡ буласаҡ. Был үҙенең мөһимлеге буйынса бик ҙур бурысты уңышлы үтәү өсөн хәҙерҙән үк әҙерлекте йәйеп ебәрергә кәрәк. Башҡортостандың ауыл хужалығы работниктары иптәш Сталинга яҙған хаттарында иген әҙерләү планын сроғынан алда — 20 сентябргә үтәргә һүҙ бирҙеләр. Был йөкләмәне үтәү өсөн һәр бер коммунист, колхозсы, һәр бер ауыл хужалығы работнигы намыҫ менән көрәшергә тейеш.

Беҙ иптәш Сталинга биргән вәғәҙәләрҙе үтәүҙең иң яуаплы этабында торабыҙ. Уны үтәү өсөн көрәшкә бөтә халыҡты күтәреү — партия ойошмаларының изге бурысы.

БАССР Министрҙар Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы Ишембай-Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә ҡатнашыусы районарҙың һәм тимер юл Министрствоһы прораб пункттарының июндең икенсе ун көнлегендәге эшен ... Дәүләкән районын (район Советы башҡарма комитеты председателе вазифаһын үтәүсе У. С. Ибраһимов, ВКП(б) район комитеты секретаре А. Ф. Масленников) еңеүсе тип таныны. Дәүләкән районына БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы һәм айырыуса яҡшы эшләгән колхозсыларға бүләк өсөн 15 мең һум аҡса бирелде.

Июндең икенсе ун көнлегендә Маҡар, Стәрлетамаҡ, Мәләүез, Воскресен һәм Көйөргәҙе райондары яҡшы эшләгәнлектәре билдәләнде.

Тимер юл Министрствоһының тимер юл төҙөүҙә ҡатнашыусы төҙөлөш участкалары араһынан социалистик ярышта Стәрлетамаҡ прораб пункты (начальнигы Я. М. Романов, партия ойошмаһы секретаре Е. М. Войтенко) еңеүсе тип табылды.

Был прораб пунктына БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Ҡыҙыл Байрағы һәм айырыуса өлгө күрһәткән эшселәргә бүләк өсөн 10 мең һум аҡса бирелде.

УРОЖАЙ ЙЫЙНАУҒА ӨЛГӨЛӨ ӘҘЕРЛӘНЕРГӘ!

Штурмлауға иҫәп тотола

Шаран МТС-ының территорияһы тыныс. Мастерской тирәһендә кешеләр ҙә бик һирәк күренәләр. Тик онотолғанда бер һуғылған сүкеш тауышы ғына ишетелеп ҡала. Ремонтҡа килтерелгән комбайндар усадьбала тутығып ултыралар.

МТС-тың контораһында ла тынлыҡ. Уның ишеге янында ҡояшҡа уңған, ямғырға юйылған таҡта тора. Беҙ уны ғәжәпләнеп ҡарайбыҙ.

— Ул күрһәткестәр таҡтаһы. Уның уң яҡтағыһы ҡыҙыл, ә һул яҡтағыһы ҡара,—тип күрше кюсҡалағы ҡыҙ беҙгә справка бирә.

— Ә ниңә бер нәмә лә яҙылмаған? Нәмәне күрһәтә һуң был күрһәткестәр таҡтаһы?

— Бер нәмәне лә күрһәтмәй, — ти баяғы ҡыҙ.

«Күрһәткестәр таҡтаһының» ошолай ташландыҡ хәлдә тороуы уҡ МТС етәкселәренең эштәре тураһында асыҡ һөйләй.

Беҙ комбайндар ремонты барышы тураһында һораштыҡ. Был турала МТС етәкселәренең әйткән цифрҙары беҙҙе аптырашта ҡалдырманы, әлбиттә. Улар — МТС-тағы бөтә эш күренешенә, обстановкаға лайыҡлы тына цифрҙар ине. 17 комбайндың 4-һе генә ремонттан сыҡҡан. 25 июнь һуңғы срок. Ә ул килеп тә етте.

МТС партия ойошмаһы секретаре иптәш Овчаровҡа мөрәжәғәт иттек. Ул:

— Беләһегеҙме, иптәштәр, мин яңы ғына колхоздарҙан ҡайттым. Һуңғы сводканы белмәйем, — тип яуап бирҙе. Беҙ уға ярҙамға килдек, цифрҙарҙы белдерҙек.

— Эштәр шәптән түгел шул, — тине ул.

— Сәбәбе?

— Сәбәбеме? Комбайндарҙы ремонтлау планының үтәлмәүе тураһындамы? — Ул асыҡ яуап бирә алманы. — Беләһегеҙме, иптәштәр, һеҙ был турала өлкән агроном Деркачтан һорағыҙ. Ул төплө итеп һөйләп бирер.

Сәбәптәр тураһындағы һорауға яуап биреүҙә директорҙың политик эш буйынса урынбаҫары иптәш Хәфизов артыҡ оптимист булып сыҡты.

— Срок үтһә лә, ашлыҡ өлгөрмәгән бит әле. Авторитетле әйтәмен, бер-ике көндә тағы 6 комбайн аяҡҡа баҫтырыла. Ә ҡалғаны бер аҙ һуҡыраҡ. Был конкрет. Штурмға күсәбеҙ, — ти ул. Уның был һүҙҙәрендә эш өсөн большевистик көрәш күренмәй, ә зарарлы хуш күңеллелек асыҡып тора. Фактылар ҙа уның һүҙҙәрен яҡлап түгел, ә ҡаршы һөйләйҙәр.

МТС-тың өлкән механигы иптәш Тихонов трактор бригадаларынан ҡайтмай. Ремонтта бөтә эш иптәш Сергей Третьяковҡа тапшырылған. Был инициативаһыҙ механик эште үҙ ағышына ҡуйған. Ремонтсылар араһында дисциплина юҡ, социалистик ярыш ойошторолмаған. Политик-массовый эш алып барылмай. 27 кешенән көн һайын тик 10—13 эшсе ремонтта ҡатнаша. 4 комбайнер, 6 комбайнер ярҙамсыһы ремонтҡа ылыҡтырылмаған.

Насар етәкселек һәм эште ойоштормау МТС-та комбайндар ремонтлауҙы өҙөүгә килтерҙе. Төҙә графикте үтәмәү, һүлпән эшләү, һуңынан штурмға күсеү — быйылда МТС етәкселәренең эш стиленә әйләнеп киткән.

Уҙған йыл да шулай булды. Урожай йыйнауға ваҡыт бик аҙ ҡалғас ҡына комбайндарҙы ашығыс ремонтлау башланды, сифатҡа иғтибар ителмәне. Шуның һөҙөмтәһендә бер-нисә комбайн хатта колхоздарға ла барып етмәне, юлда ватылып ҡалды. Ошо уҡ күңелһеҙ хәл быйыл яҙ тракторҙар менән ҡабатланды.

Шаран МТС-ы етәкселәренә (директоры иптәш Карманов) был зарарлы һәм хата эш стиленән баш тартырға һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары талап иткәнсә эшкә тотонорға бик ваҡыт инде.

И. Абдуллин.
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Республика МТС-тарында комбайндар ремонты барышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 20 июненә, процентәрҙә).

Ташлыкүл	104	Ямаш	54	Шаран	39
Акт	100	Ярослав	54	Дурас	38
Божор	100	Ишле	54	Калинников	38
Шәрип	100	Әбдрәзәк	53	Базан	37
Ерекле	100	Үләй	53	Мишкә	36
Дүртөйлө	92	Благовар	52	Покровка	36
Аксен	79	Сынташтамаҡ	52	Тәтешле	36
Рәжәп	77	Суйынсы	52	Бәләбәй	35
Арыҫлан	75	Йәнегет	52	Степановка	35
Байҡы	74	Ҡарламан	52	Дмитриев	35
Подгорный	74	Бишбүләк	50	Күгәрсен	35
Ҡариҙел	72	Бөрө	50	Һурән	33
Миәкә	71	Краснохолм	50	Арҡауыл	33
Моторный	71	Чурай	50	Балтач	32
Ташлы	70	Мәсем	50	Хоҙайбирҙин	32
Иглин	67	Ермолаевка	50	Дыуан	30
Кушнаренко	67	Михайловка	50	Сибай	28
Ҡушйылға	65	Елдәр	48	Андреевка	27
Нуриман	65	Степной	48	Архангель	27
Октябрь	65	Әбдрашит	47	Подлуб	27
Туймазы	64	Бүздәк	47	Ергән	27
Чапаев	64	Орлов	47	Һуҡайлы	27
Аскын	63	Петровск	46	Күнләрәк	26
Баҡалы	63	Стәрлетамаҡ	46	Полянск	25
Шланлы	63	Урмияз	45	Абзан	24
Байғужа	62	Белоҡатай	45	Ҡарыш	24
Ҡандра	62	Мәсетле	45	Ҡалмыҡ	23
Маҡар	61	Ямалы	44	Усень-Ивановка	23
Ҡалтасы	61	Стәрлебаш	44	Теләкәй	23
Хәйбулла	61	Кәсәү	43	Маляяз	23
Күрҙем	60	Имәнлекүл	43	Языково	22
Йәрмәкәй	60	Федоровка	43	Охлебинин	20
Саҡмағош	60	Шишмә	42	Булгак	20
Борай	59	Мәсәғүт	42	Забельский	20
Туҡмаҡлы	59	Усть-Икин	42	Учалы	18
Яҡауыл	59	Таутөмән	41	Бурлы	17
Ҡыйғы	59	Нәркәй	41	Матрай	17
Аслыкүл	58	Һаҡмар	41	Байрамғол	14
Мәләүез	56	Күзәй	40	Ыылайыр	11
Услы	56	Ново-Троицк	40	Байыш	11
Приют	55	Баймаҡ	40	Оло-Тиләк	10
Мрак	55	Ҡырмыҫҡалы	40	Әлмөхәмәт	7
Дәүләкән	54	Таймаҫ	40		
Ҡорос	54	Пугачев	40		

Әҙерлек яҡшы

«Равенство» колхозы (Йомағужа районы) урожай йыйнауға әҙерлекте тамамланы. 2 урғыс, тиҫтәләгән ҡул салғыһы, урәҡтар әҙер. Молотилка һәм елгәргестәр ҙә ремонтланды. Шулай уҡ ямалы ырҙыҡтар эшләнә башланы.

Колхозда сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эше лә яҡшы ойошторолған. Звенолар хәҙер ашлыҡтарҙы икенсе ҡат утауҙы тамамланылар.

Ф. Ғималетдинов.

Йыллыҡ планды—7 ноябргә үтәйек!

Алдынғыларҙың эш методтарын ҡулланып

Өфө резина промышленносе заводы коллективы йыллыҡ планды Бөйөк Октябрь социалистик революцияһының 31 йыллығы көнөнә — 7 ноябргә үтәү өсөн көрәшеп, яңы производство уңыштарына өлгәште. Ярты йыллыҡ план 5 айҙа 10 көндә үтәлде.

Начальнигы иптәш Бушуев булған цех айырыуса яҡшы эшләй. Бында хеҙмәт етештереүсәнлеге беренсе квартал менән сағыштырғанда 26 процентҡа күтәрелде.

Производствоның алдынғы новаторҙары Львова, Засыпкина, Семенова көн һайын ике һәм унан да артығыраҡ норма бирәләр. Уларҙың өлгөһөндә эшләүселәрҙең һаны көндән-көн арта бара. Первушина, Кожетова, Краснова һәм башҡа иптәштәр алдынғыларҙың эш методтарын ҡулланып, смена заданиеларен 150—160 процентҡа еткереп үтәй башланылар.

А. Иманғулов.

План сроғынан алда үтәлде

Автотранспорт конторы Ленин орденле «Туймазынефть» тресының хәл иткес предприятиеларенең береһе. Транспортсыларҙың уңышлы эшләүҙәренән күп ваҡыттарҙа бораулаусыларҙың, төҙөүселәрҙең уңышҡа ирешеүҙәре хәл ителә.

Ағымдағы йылда автотранспорт конторы, уҙған йылға ҡарағанда, бик күп яҡшы эшләй. Контора коллективы Октябрь алды социалистик ярышына ҡушылып йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәү өсөн көрәшә.

10 июндә автотранспортсылар беренсе ярты йыллыҡ планды сроғынан алда үтәүҙәре тураһында рапорт бирҙеләр. 6 айлыҡ план 106 процентҡа үтәлгән.

И. Болдогоев.

Белорет металлургия заводының механик цехында эшләүсе токарь В. Ф. Агкатов биш йыллыҡ норманы апрель айында уҡ үтәп, 1950 йыл иҫәбенә эшләй. Ул һәр көндө норманы 235 процентҡа үтәй.

Һүрәттә: Комсомолец В. Ф. Агкатов эш өҫтөндә.

Л. Якубов фотоһы.

Практик эш менән

ИШЕМБАЙ. «Көҫәпкол» промартеленең кирбес заводы эшселәре Октябрь алды социалистик ярышына ҡушылып, йыллыҡ планды сроғынан алда үтәргә йөкләмә алдылар. Улар 7 ноябргә план буйынса 500 мең урынына, 600 мең кирбес эшләп сығарыуға һүҙ бирҙеләр.

Завод коллективы үҙ йөкләмәһен практик эш менән аҡлау өсөн көрәшә. Кирбес һуғыу мастеры Әхмәтова Көмөшбикә, Абдуллина Тимербикә, Шөғәипова Сара, Фәтҡуллина Мәнәүәрә, балсыҡ әҙерләүсе Ишембаева Сәхипъямал, Кәримова Мәғәфүрә һәм башҡа иптәштәр көндәлек нормаларын 130 — 150 процентҡа еткереп үтәйҙәр.

Заводта етештереүсәнлекте күтәреү маҡсатында механиклаштырылған дүрт цех ойошторолдо.

Х. Дәүләтшин.

Юрезань юлын төҙөүҙә

Юрезань тимер юлын төҙөүселәр араһында Октябрь алды социалистик ярышы көндән-көн киңәйә бара. Ер ҡаҙыусы К. Миңнеәхмәтов 15 июндән 1 октябргә тиклем 550 кубометр ер ҡаҙыуҙы тамамларға ҡарар итеп, хәҙер көн һайын ике норма бирә. Зәйнетдинов, Добрин, Залкмов һәм башҡа иптәштәр ер ҡаҙыу заданиеһен 170 процентҡа тиклем еткереп үтәйҙәр.

Вагонсыларҙың уңыштары

Яҡауыл вагондар депоһы коллективы йыллыҡ планды 7 ноябргә үтәү өсөн үҙ-ара социалистик ярышты киң йәйелдереп, сталинсе тимер юлсылар көнөн производство еңеүҙәре менән ҡаршыларға әҙерләнә.

Социалистик ярышта ҡойоу цехы (начальнигы иптәш Кислицын) эшселәре айырыуса юғары етештереүсәнлек бирәләр. Улар июнь айы планын 15 көн сроғынан алда үтәнеләр.

Мастер Белан һәм Головинкин иптәштәрҙең участкалары тотошлай стахановсы. Балта оҫталары П. Чигвинцев, Г. Чухлинцев иптәштәр көндәлек заданиене 200 процентҡа үтәйҙәр. Ә слесарь Бакулев һәм Путилов иптәштәр систематик рәүештә ике ярым норма биреп килаләр. Тикшереүсе-автоматчик Чейкасов, вагранщик Дәүләтханов, ҡойоусы Гребенщиков иптәштәр стахановсы хеҙмәт өлгөләре күрһәтәләр.

М. Фатихов.

Стахановсыларҙың һаны көндән көн арта

ЧЕРНИКОВСК. (Телефон аша): Машиналар төҙөү заводында биш йыллыҡ планды үтәүсе стахановсыларҙың һаны көндән-көн арта бара.

Иптәш Брускин начальник булған цехта 50-нән артыҡ стахановсы май һәм июнь айҙарында биш йыллыҡ нормаларын үтәнеләр. Улар араһында заточник Хисматуллин, Ямалетдинов иптәштәр 1950 йыл аҙағына тиклем 10 йыллыҡ план үтәү өсөн көрәшәләр. Стахановсы слесарь Исаков 6 йыллыҡ, фрезеровщик Самуйлов 6 йыл ярым, токарь Безлетнов, фрезеровщик Петров һәм Марков иптәштәр 7,5 йыллыҡ норма бирҙеләр.

Заводта танылған стахановсы слесарь-лекальщик коммунист иптәш Павел Ухов 10,5 йыллыҡ нормаһын үтәп, биш йыллыҡ аҙағына тиклем 12 йыллыҡ норма үтәү өсөн көрәшә.

М. Мостафин.

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете пленумы

Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауҙа һәм иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында

«Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауҙа һәм иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары» тураһында доклад менән ВКП(б) Өлкә комитете секретаре иптәш Каменев сығыш яһаны.

— Иптәш Сталинға яҙған хатта Башҡортостандың колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре, ауыл хужалығы специалистәре 1948 йылда ауыл хужалығын күтәреү буйынса серьез йөкләмәләр алдылар, — ти иптәш Каменев. — Был йөкләмәләрҙе үтәү өсөн республиканың МТС-тары һәм совхоздары, [illegible] колхоздары, бригадалары һәм звенолары көстәрен аямай көрәшәләр.

Беҙ иптәш Сталинға колхоздарҙың совхоздарҙың 1948 йылда һабан ашлыҡ культуралары майҙанын 488 мең гектарға киңәйтергә, яҙғы бойҙай сәсеү майҙанын [illegible] арттырырға һәм ағымдағы йылда бөртөклө ашлыҡ культураларынан урожай алыуҙың [illegible] тиклем [illegible] уҙып китергә һүҙ бирҙек. Государствоға иген һәм ауыл хужалығы продукттарын тапшырыу планының срогынан алда үтәргә иттек. Колхоздарҙа малдар һанының [illegible] малдарҙы 23,2 процентҡа, һарыҡтарҙы 32,1, сусҡаларҙы 105 һәм аттарҙы 15 процентҡа арттырырға йөкләмә алдыҡ.

Хәҙер беҙ яҙғы сәсеүҙе нигеҙҙә тамамланыҡ инде, иптәш Сталинға [illegible] буйынса үҙебеҙҙең эшебеҙгә йомғаҡ яһарға ваҡыт етте.

Ағымдағы йылда республикала яҙғы сәсеүҙе үткәреү шарттары, үткән йылға ҡарағанда, уңайлыраҡ булды. Колхоздарҙың һәм совхоздарҙың һабан ашлыҡ өсөн [illegible] һәм туҡта [illegible] күберәк ине. Машина-трактор станциялары тракторҙарҙы ремонтлауҙы иртәрәк тамамланылар. Государство колхоздарға орлоҡ ссудалары, МТС һәм совхоздарға — 760 трактор, күп кенә һабан һәм башҡа ауыл хужалығы машиналары бирҙе.

Яҙғы сәсеүгә әҙерләнгән һәм уны үткәргән осорҙа өлкә партия ойошмаһы колхозсылар, МТС һәм совхоз эшселәре араһында ҙур ойоштороу һәм массовый-политик эш алып барҙы.

Республикабыҙ ауыл хужалығы работниктәренең 1948 йылда ауыл хужалығын күтәреү буйынса йөкләмәләр алып, иптәш Сталинға яҙған хаты иғлан ителгән осорҙа колхозсылар, МТС һәм совхоз работниктәре араһында политик эш бигерәк тә киң колас алды. Был хаттың әһәмиәте колхозсыларҙың, МТС һәм совхоз эшселәренең лә[illegible] һәм йыйылыштарында, бригадаларҙа һәм звеноларҙа аңлатылды.

Иптәш Сталинға яҙылған хатта алынған йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн ҡеүәтле социалистик ярыш йәйелдерелде.

Ярыштың тәүге этабында Башҡортостандың колхозсылары, МТС һәм совхоз работниктәре үҙ алдарында торған бурыстарҙы уңышлы ғына үтәнеләр һәм ауыл хужалығын күтәреүҙә үҙҙәренең йөкләмәләрен үтәү өсөн ныҡлы нигеҙ һалдылар.

Яҙҙың һуңлап килеүенә ҡарамаҫтан, колхоздар һәм совхоздар яҙғы сәсеүҙе, 1947 йылға ҡарағанда, ойошҡаныраҡ үткәрҙеләр һәм һабан ашлыҡ культураларын яҡшыраҡ срокторҙа сәстеләр.

Республика колхоздары һәм совхоздары 15 июнгә сәсеү планының 99 процентҡа үтәнеләр. Бөртөклө һабан ашлыҡ культураларының майҙаны, үткән йыл менән сағыштырғанда, 27 процентҡа, бойҙай 99 процентҡа артты.

— Ләкин республикала, — ти иптәш Каменев, — яҙғы сәсеү уңышлы үткәрелде тип әйтә алмайбыҙ. Һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙең государство планы колхоздарҙа үтәлеп еткерелмәне. Күп кенә райондар, яҙғы сәсеүҙе тиҙ тамамлау өсөн бөтә мөмкинлектәре булыуға ҡарамаҫтан, уны 15 июнгә тиклем һуҙҙылар, башҡа райондарға ҡарағанда сәсеүгә иртәрәк төшкән Мәләүез, Көйөргәҙе, Йомағужа, Воскресен райондары бөгөн дә сәсеүҙе дауам итәләр.

Һабан ашлыҡ культураларын, [illegible] әйткәндә бойҙай сәсеү планының үтәлеп еткерелмәүендә төп сәбәптәрҙең береһе — ВКП(б)-ның айырым район комитеттәре секретарҙәре һәм район Советы башҡарма комитеттәре председателдәре тарафынан государство планының үтәүгә серьез мөнәсәбәт итмәүҙән тора.

Яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә Мәләүез һәм ҡайһы бер башҡа райондарҙың артта ҡалыуы беренсе нәүбәттә колхозсылар һәм МТС работниктәре араһында политик эштең насар булыуы менән аңлатыла.

Яҙғы сәсеүҙә күп кенә машина-трактор станциялары ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләнеләр. Трактор эштәренең яҙғы планы тотош республика буйынса 10 июнгә 110 процентҡа үтәлгән булһа ла, шул уҡ ваҡытта, 34 МТС планды үтәмәне. МТС-тарҙың күпселек өлөшө ауыл хужалығы эштәрен үткәреүҙә договорҙа билдәләнгән сроктарҙа колхоздар алдында үҙҙәренең йөкләмәләрен үтәмәне.

МТС-тарҙың колхоздар менән төҙөшкән договорҙарҙы үтәмәүҙәрендәге төп сәбәптәрҙең береһе — трактор паркының етештереүсәнлеге түбән булыуҙа. Ошо йылдың 10 июненә республикала шартлы бер тракторға сменаға эшләп сығарыу норма буйынса 3,4 гектар урынына ни бары 1,8 гектар тәшкил итте. Беҙҙә бер тракторға сменала бер гектарҙан да аҙ эшләп сығарған МТС-тар ҙа бар. Ундайҙар иҫәбенә Йылайыр, Оло-Тиләк һәм Ҡаранйел машина-трактор станциялары инәләр. Алдынғы колхозсылар был МТС-тарҙың трактористәренә ҡарағанда, аттар һәм үгеҙҙәр менән күпкә күберәк эшләп сығарҙылар.

Трактор паркының бындай түбән етештереүсәнлеге бөтәһенән элек, тракторҙарҙың күп ваҡыт тик тороуҙары, төнгө сменаларҙа эштең ойошторолмауы һәм трактор бригадаларында тейешле дисциплинаның булмауы, шулай уҡ трактор бригадаларын техник яҡтан хеҙмәтләндереүҙең сиктән тыш насар булыуы менән аңлатыла.

Тракторҙар паркының эшләп сығарыуын күтәрсү өсөн тракторҙарҙың тик тороуҙарын килтереп тыуҙырған сәбәптәрҙе бөтөрергә, трактор бригадаларында дисциплинаны нығытырға һәм уларҙы техник яҡтан хеҙмәтләндереүҙе ҡырҡа яҡшыртырға кәрәк.

Ҡайһы бер райондарҙа күп һанда яңы тракторҙар алыуға ышанып, баҫыу эштәрендә йәнле тартыу көстәрен файҙаланыу тураһында хәстәрлек күрмәй башланылар, ул яҙғы сәсеү темпының түбәнәйеүенә килтерҙе. Иглин районы колхоздары йәнле тартыу көстәре менән һабан ашлыҡ өсөн 4.700 гектар ер һөрөргә тейештәр ине, ә ни бары 3 мең гектар ер һөрөлдө, икенсе төрлө әйткәндә, һәр бер эш атына һәм үгеҙенә, яҙғы сәсеү осоронда, уртаса 1,5 гектар ғына ер һөрөлдө.

Өлкә партия ойошмаһының бурысы шунан тора: яҙғы баҫыу эштәренә етәкселек итеүҙәге етешһеҙлектәрҙе тиҙерәк бөтөрергә, яҙғы сәсеүҙә өлгәшелгән уңыштарҙы нығытырға һәм бөтә ауыл хужалығы культураларынан юғары урожай алыу өсөн көрәште көсәйтергә кәрәк.

— Сәсеүлектәргә ваҡытында һәм өлгөлө тәрбиә күрһәтеү—юғары урожай өсөн көрәштең мөһим этабы булып тора, — ти иптәш Каменев. — Башҡортостан баҫыусылыҡ станцияһының күп йылдар буйынса алып барған күҙәтеүенә ҡарағанда, ҡый үләндәре менән уртаса сүпләнгән баҫыуҙарҙа өс тапҡыр утау үткәреү яҙғы бойҙай урожайын ике тапҡырға тип әйтерлек күтәрә.

Республикабыҙҙың күп кенә райондарында һәм колхоздарында сәсеүлектәргә тәрбиә күрһәтеү саралары бер ҙә баһаланмай. Үткән йыл Башҡортостан колхоздарында бөртөклө ашлыҡтарҙы ҡый үләндәренән таҙартыу урожай йыйнауға тиклем лауыҙ итһә лә, сәсеүлектәрҙең 91 проценте генә уталды. Тары, майлы, техник культуралар, картуф һәм йәшелсә сәсеүлектәрен тәрбиәләү бигерәк тә насар ойошторолдо. Мәҫәлән, көнбағышты һирәкләтеү бөтөнләй үткәрелмәне һәм был культура сәсеүлегенең өстән бер өлөшө уталманы. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшен механизациялаштырыу һанға һуғылманы. МТС-тар үткән йылда пропаш культураларҙы тракторҙар менән культивациялау планын ни бары 8 процентҡа үтәнеләр.

Сәсеүлектәрҙе ошолай насар тәрбиәләү арҡаһында ла күпселек колхоздар 1947 йылда тары, картуф, майлы һәм техник культуралар ҙан бик түбән урожай алдылар.

Быйыл да ҡайһы бер район, МТС һәм колхоз етәкселәре был эштә ғәфү итмәҫлек ғәмһеҙлек күрһәтәләр. Республикала 15 июнгә бөртөклө ашлыҡ культураларын утау планы 46 процентҡа, ә Хәйбулла районында ни бары 11 процентҡа, Учалы районында—15, Шаран районында—21 процентҡа ғенә үтәлде.

Быйылғы яҙ шарттарында сәсеүлектәргә үҙ ваҡытында һәм яҡшы сифатлы тәрбиә күрһәтеү саралары айырыуса ҙур әһәмиәткә эйә. Шуның өсөн дә бөртөклө һабан ашлыҡ культураларын һәм тары утауҙы иң ҡыҫҡа срокта, был культуралар быуынға ултырғанға тиклем, тамамларға кәрәк. Көнбағыш, шәкәр сөгөлдөрө, картуф, йәшелсә культураларын, шулай уҡ киң рәтле итеп сәселгән тары һәм ҡара бойҙайҙың рәт араларын эшкәртеү киҫектермәҫтән йәйелдерелергә тейеш. Сәсеүлектәрҙең рәт араларын эшкәртеүҙә, шәкәр сөгөлдөрө һәм көнбағыш сәсеүлектәрен һирәкләтеүҙә тракторҙарҙы киң ҡулланыу өсөн бөтә мөмкинлектәрҙе максималь файҙаланырға кәрәк.

Күк һағыҙ сәсеүлектәрен тәрбиәләүгә айырыуса ныҡ иғтибар бирергә кәрәк. Сәсеүлектәрҙе, беренсе нәүбәттә күк һағыҙ, шәкәр сөгөлдөрө, орлоҡ участкалары, бөртөклө ашлыҡ һәм башҡа культуралар сәсеүлектәрен, урындағы һәм минераль ашламалар менән киң күләмдә аҙыҡландырырға кәрәк.

— Сәсеүлектәргә тәрбиә сараларын ваҡытында һәм юғары сифатлы итеп үткәреүҙә, — ти иптәш Каменев, — колхоздарҙа бөтә хеҙмәт ресурстарын тулы файҙаланыу, хеҙмәтте ойоштороу, хеҙмәтте иҫәпләү һәм уға түләү—хәл иткес шарттар. Колхоздарҙа ойошторолған бөтә звеноларҙың үҙҙәренә беркетелгән участкаларында эшләүҙәренә өлгәшергә, сәсеүлектәргә тәрбиә күрһәтеү буйынса бөтә эштәрҙә индивидуаль сдельщинаны киң ҡулланырға һәм һәр бер бригадала, звенола хеҙмәткә дөрөҫ учет булдырыуҙы ғәмәлгә ашырырға кәрәк. Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенә колхоздың бөтә эшкә һәләтле кешеләрен, шулай уҡ үҫмерҙәрҙе ылыҡтырырға кәрәк.

Иптәш Каменев колхоздарҙың мөһим бурысына — үҙҙәрен үҙ сәсеү орлоҡтары менән тәьмин итеү мәсьәләһенә туҡтала. Ҡайһы бер колхоз етәкселәре государство иҫәбенә йәшәргә шундай өйрәнделәр, улар үҙҙәренең орлоҡтарын с[illegible]тереү тураһында бөтөнләй х[illegible]рлек итмәй башланылар. Мәҫәлән, Федоровка районының «Красный партизан» колхозында орлоҡ участкалары сәсеүҙән һуң ғына бүленде. Был участкаларҙа һөрөү һай булды, орлоҡтар насар күмелделәр. Ҡайһы бер колхоздарҙа орлоҡ участкаларын тәрбиәләү буйынса махсус звенолар ҙа ойошторолмаған. Ауыл хужалығы Министерствоһының мәғлүмәттәре буйынса ундай колхоздар 200-ҙән артыҡ һанала. Орлоҡ участкаларында сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү насар ойошторолған. Ошо көнгә тиклем арыштың орлоҡ участкаларын утамаған колхоздар ҙа бар.

Колхоздарҙа үҙ сәсеү орлоҡтарын етештереүгә бындай ғәмһеҙ мөнәсәбәткә сик ҡуйырға һәм дөйөм государство әһәмиәтендәге ошондай мөһим эшкә һалҡын ҡараған район ауыл хужалығы бүлектәре һәм колхоз етәкселәрен тәртипкә саҡырырға бик ваҡыт инде. Орлоҡ участкаларындағы сәсеүлектәргә өлгөлө тәрбиә ойоштороуҙы һәм ул участкаларҙан урожай йыйнап алыуҙы үҙ ваҡытында тәьмин итергә кәрәк.

Иптәш Каменев артабан пар күтәреү һәм уны эшкәртеү мәсьәләһенә туҡтала. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары буйынса Башҡортостан колхоздары һәм совхоздары пар һөрөүҙе 10 июнгә тамамларға тейештәр ине. Ә ғәмәлдә был көнгә план колхоздарҙа 14 процентҡа, 15 июнгә 30,7 процентҡа ғына үтәлде. Совхоздарҙа пар һөрөү планы 70 процентҡа үтәлде. Ҡайһы бер райондар, мәҫәлән, Федоровка, Благовар, Бәләбәй, Ҡырмыҫҡалы һәм Стәрлебаш райондары, әле булһа пар һөрөүҙе массовый рәүештә йәйелдермәгәндәр.

Республикала һабан ашлыҡ культураларын сәсеүҙе май айында тамамлаған һәм һаман да пар һөрөүгә төшмәгән йөҙәрләгән колхоз бар. Был колхоздар ауыл хужалығы эштәре араһында өҙөклөккә юл ҡуйҙылар һәм пар күтәреүҙә иң яҡшы срокторҙы әрәм иттеләр.

Пар һөрөүҙе артабан һуҙыу уның файҙалылығын бик ныҡ түбәнәйтеүгә алып бара. Пар һөрөүҙе тиҙерәк тамамлау өсөн беҙ бөтә сараларҙы күрергә тейешбеҙ. Пар күтәреүҙә тракторҙар паркы менән бер рәттән, эш аттарын да, эш үгеҙҙәрен дә күп өлөшөн файҙаланырға кәрәк.

— Колхоздарҙа общественный малдарҙы күтәреү буйынса алынған йөкләмәләрҙе үтәү,—ти иптәш Каменев, — малдар өсөн аҙыҡ әҙерләүгә айырыуса ныҡ иғтибар итеүҙе талап итә. Ныҡлы аҙыҡ базаһынан башҡа ул йөкләмәләрҙе үтәп булмаясаҡ. Үкенескә ҡаршы, колхоз малдары өсөн аҙыҡ әҙерләү ҡайһы бер район партия һәм совет ойошмаларының иғтибар үҙәгендә тормай әле. Үткән йыл Стәрлетамаҡ, Баҡалы, Йылайыр һәм Краснокам райондарында тәбиғи болонлоҡтарҙың ҙур майҙандары сабылмайынса ҡалды.

Бесән сабыуҙың һәм аҙыҡ силослауҙың иң ҡыҙыу ваҡыты килеп етте. Колхоздар бер миллионға яҡын майҙанда бесән сабырға, 670 мең тонна силос һалырға тейештәр. Бесән сабыуҙы һәм силослауҙы уңышлы үткәреү өсөн колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа булған бөтә бесән сапҡыстарҙы һәм лобогрейкаларҙы эшкә ҡушырға һәм уларҙы юғары етештереүсәнлекле итеп файҙаланырға кәрәк. Ҡайҙа ул[illegible]алар әҙер түгел, уларға ремонтты яҡын көндәр эсендә тамамларға кәрәк. Болонлоҡтар колхоз бригадаларына беркетелергә, уларға бесән сабыуҙың графигы еткерелергә һәм уның үтәлеше тәьмин ителергә тейеш. Бесән сабыуҙа индивидуаль сдельщинаны киң ҡулланырға һәм билдәләнгән эшләп сығарыу нормаларының бесән сабыуҙа ҡатнашҡан һәр бер колхозсы тарафынан үтәлеүенә өлгәшергә кәрәк.

Бесән сабыу менән бер рәттән мал аҙығы силослауҙы киң фронт менән йәйелдерергә, бесән сабыуҙы ла, шулай уҡ силослауҙы ла һәр бер районда, колхозда һәм совхозда урағҡа төшкәнгә тиклем тамамларға кәрәк.

Артабан иптәш Каменев урожай йыйнау мәсьәләләренә күсә.

— Ағымдағы йылда республика колхоздарында һәм совхоздарында,—ти ул,—үткән йылдарға ҡарағанда, урожай йыйнау бик ныҡ айырыла. Был айырма бөтәһенән элек урып-йыйнау эштәренең күләме ҙур булыуҙан тора. Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа бөтә ауыл хужалығы культуралары буйынса урып-йыйнау майҙаны, үткән йылға ҡарағанда, 476 мең гектарға артыҡ.

Быйыл беҙ ужым һәм бөртөклө иртә һабан ашлыҡ культураларын, үткән йылға ҡарағанда, 574 мең гектарға артыҡ йыйырға тейешбеҙ. Был да бер ни тиклем урып-йыйнау эштәренең көсөркәнешлеген арттыра.

Ашлыҡтарҙың үҫеүе һәм өлгөрөүе быйыл иртәрәк буласаҡ. Бөтә мәғлүмәттәргә ҡарағанда урожай йыйнау, үткән йылға ҡарағанда, элгерәк башланасаҡ, шулай булғас, урып-йыйнау эштәренә әҙерлек ваҡыты ҡыҫҡара тигән һүҙ.

Тимәк, быйылғы шарттарҙа урожай йыйнауҙа аҙ ғына ла һуңға ҡалыу ҙур юғалтыуҙарға килтереүе мөмкин.

Республиканың партия һәм совет ойошмалары алда торған урожай йыйнауҙы иң ҡыҫҡа срокторҙа үткәреү өсөн бөтә көстө, средстволарҙы һәм резервтарҙы туплаларға һәм ваҡытында әҙерләргә тейештәр.

Республиканың колхоздары, МТС-тары һәм совхоздары урожай йыйнауға нисек әҙерләнәләр һуң? МТС-тар 10 июнгә комбайндар ремонты планын 32 процентҡа үтәнеләр. Молотилкаларҙы ремонтлау менән эш шәптән түгел. Молотилкаларҙы ремонтлау МТС-тарҙа ни бары 11 процентҡа, колхоздарҙа 38 процентҡа ғенә үтәлде.

Урожай йыйнауҙың ябай машиналарын ремонтлау менән дә шундай уҡ хәл. 15 июнгә колхоздарҙа атлы урғыстарҙы һәм лобогрейкаларҙы ремонтлау планы 23 процентҡа, совхоздарҙа 45 процентҡа үтәлде.

Колхоздарҙа һәм совхоздарҙа сушилкалар, япмалар һәм япмалы ырҙындар төҙөү һәм ремонтлау ҙа ҡәнәғәтләнерлек бармай.

Былар бөтәһе лә күп колхоздарҙың, МТС һәм совхоздарҙың үткән йылғы хаталарҙы ҡабатлауҙары тураһында һөйләйҙәр. Ул саҡта комбайндарҙы, молотилкаларҙы, ябай машиналарҙы һәм сушилкаларҙы ремонтлау урожай йыйнауға төшкәнсе барғайны һәм урып-йыйнау ваҡытында ла дауам иткәйне.

БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһы, партияның ҡайһы бер район комитеттәре һәм район Советы башҡарма комитеттәре урожай йыйнауға әҙерлеккә ҡәнәғәтләнмәҫлек етәкселек итәләр.

Тәтешле, Воскресен, Ғафури, Балтач һәм Матрай райондары колхоздары ошо йылдың 10 июненә бер генә урып-йыйнау машинаһын да ремонтламағандар, ә Аскын, Байҡыбаш, Благовещен, Дәүләкән, Стәрлебаш һәм башҡа ҡайһы бер райондарҙың колхоздары әле һаман сушилкаларҙы ремонтлауға башламағандар. БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһы һәм партияның район комитеттәре был район колхоздарында урып-йыйнау машиналарын һәм сушилкаларҙы ремонтлауҙы ойоштороу тураһында хәстәрлек күрмәйҙәр.

Урожай йыйнауға әҙерлектә артта ҡалыуҙы иң ҡыҫҡа срокта бөтөрөү өсөн республиканың Ауыл хужалығы Министерствоһы, партия район комитеттәре һәм район Советы башҡарма комитеттәре тарафынан был мөһим эшкә етәкселекте ҡырҡа яҡшыртырға кәрәк. Артта ҡалыусы райондарға, МТС һәм совхоздарға айырыуса ныҡ иғтибар ителергә тейеш.

— Урожай йыйнауға төшергә бер айҙан да артыҡ ҡалманы, — ти иптәш Каменев. — Колхоздарҙа, МТС һәм совхоздарҙа урып-йыйнауға әҙерлек эшен максималь рәүештә көсәйтергә, комбайндарға, молотилкаларға ремонтты тиҙерәк тамамларға, ябай машиналарҙы: урғыстар, лобогрейкалар, ат тырмаларын ремонтлауҙы тиҙләтергә һәм уны 1 июлдән дә һуңға ҡалмай тамамларға кәрәк. Һәр бер колхозда сушилкалар, япмалы ырҙындар, япмалар төҙөү һәм ремонтлау киң йәйелдерелергә һәм был күрһәтелгән эштәр ҡыҙыу темптар менән алып барылырға тейеш.

Партия һәм совет ойошмалары, колхоз, МТС һәм совхоз етәкселәре урожай йыйнау эштәрен үткәреү өсөн кадрҙар һайлап алыуҙа һәм уларҙы әҙерләүҙә айырыуса ныҡ хәстәрлек күрергә бурыслылар. Ураҡҡа төшкәнгә тиклем һәр бер комбайн агрегатын әҙерлекле комбайнерҙар, комбайнер ярҙамсылары һәм трактористар менән комплектовать итергә кәрәк. Һәр бер молотилканы, локомобилде һәм двигателде икешәр машинист менән тәьмин итеү өсөн бөтә МТС-тарҙа молотилка, нефттә эшләүсе двигателдәр һәм локомобилдәр машинистәренең ҡыҫҡа сроклы курстарын ойошторорға кәрәк. Иң яҡын көндәр эсендә һәр бер колхозда ат менән урожай йыйнау машиналарында: урғыстарҙа, лобогрейкаларҙа, көлтә бәйләгестәрҙә эшләү өсөн кәрәкле һанда колхозсылар бүленергә, улар, ураҡҡа төшкәнсе был машиналарҙа эшләргә өйрәтелергә тейештәр.

Һәр бер колхозда, МТС-та, совхозда, бригадала урожай йыйнауҙың эш планын хәҙер үк төҙөй башларға һәм уны 10 июлдән дә һуңға ҡалмай тамамларға кәрәк.

Урожай йыйнауҙы ҡыҫҡа срокта һәм юғалтыуһыҙ үткәреү өсөн бөтәһенән элек урожай йыйнау эштәрен йәйелдереүҙә һуңға ҡалыуға юл ҡуйырға ярамай. Уны ураҡҡа төшеүҙең тәүге көндәренән үк бөтә средстволар менән һәм ҡыҙыу темптарҙа алып барырға кәрәк.

Үткән йыл ҡайһы бер машина-трактор станцияларында Ауыл хужалығы Министерствоһының, партия район комитеттәренең һәм район Советы башҡарма комитеттәренең юл ҡуйыуҙары арҡаһында комбайндар урып-йыйнауҙа бөтөнләй, тип әйтерлек эшләмәнеләр. Ҙур күпселегендә стационарҙа һуғыу эшендә генә файҙаланылдылар. Һөҙөмтәлә комбайндар менән урожай йыйнау планы үтәлмәне, государствоға һәм колхоздарға серьез зыян килтерелде. Республиканың партия, совет ойошмалары комбайнға ҡаршы настроениеләрҙе тамырынан юҡ итергә һәм комбайндар менән урожай йыйнау планының үтәлеүен генә түгел, арттырып үтәлеүен тәьмин итергә бурыслылар.

Үткән йыл урожай йыйнауҙы үткәргәндә эштең түбән сифатлы булыуына һәм ҙур юғалтыуҙарға юл ҡуйылды. Республиканың партия һәм совет ойошмалары быйыл һәр бер колхозда һәм совхозда юғалтыуҙарға ҡаршы көрәш сараларының тулы үткәрелеүен тәьмин итергә һәм урожай һаҡлауҙы ышаныслы ойошторорға тейештәр.

Иптәш Каменев докладының артабанғы өлөшөн иген әҙерләү мәсьәләһенә арнай.

— Иптәш Сталинға яҙған хатта Башҡортостан ауыл хужалығы работниктәре 1948 йылдың урожайынан иген әҙерләүҙең государство планын срогынан алда — ошо йылдың 20 октябренә үтәргә йөкләмә алдылар, — ти иптәш Каменев.

Был йөкләмәне уңышлы үтәү өсөн көрәш республика партия һәм совет ойошмаларының, һәр бер партия, совет работнигенең политик һәм эш яғынан өлгөрөүенә серьез һынау буласаҡ. Ағымдағы йылдың урожайынан иген әҙерләүҙе уңышлы үткәреү өсөн объектив обстановка, үткән йылға ҡарағанда, быйыл уңайлыраҡ.

Ауыл хужалығындағы уңайлы шарттарҙа игенде артыҡ көс һалмайынса үҙ ағышы менән әҙерләп буласаҡ, тип уйлау хата булыр ине.

Иген әҙерләүҙең государство планын уңышлы үтәү өсөн беҙгә ауылда ғәйәт ҙур ойоштороу һәм политик эш алып барырға кәрәк буласаҡ.

Бөтәһенән элек барлыҡ партия, совет, әҙерләү ойошмаларының, республика колхоздары, совхоздары һәм МТС етәкселәренең иген әҙерләүҙе ойоштороу тураһында иптәш Сталиндең билдәле күрһәтмәләрен тайпылышһыҙ үтәүҙәренә өлгәшергә кәрәк: «Төп бурыстан ситкә китмәгеҙ, — тип өйрәтә иптәш Сталин, — урып-йыйнауҙың тәүге көндәренән үк иген әҙерләүҙе йәйелдерегеҙ һәм уны тиҙләтегеҙ, сөнки беренсе бурыс — иген әҙерләү планын үтәү».

1947 йылда тотош республика буйынса иген тапшырыу бер ни тиклем һуңлап йәйелдерелде. Мәҫәлән, 15 августҡа колхоздарҙа бөртөклө ашлыҡ культураларының 19,5 проценте йыйналғайны, ә шул уҡ ваҡытта иген әҙерләү планы ни бары 1,2 процентҡа ғына үтәлде.

Август айында иген тапшырыуҙың темпы иген әҙерләүҙең артабанғы барышын хәл итеүсе ҡәтғи тотоп, ағымдағы йылда беҙ урожай йыйнауға башлау менән иген тапшырыуҙы максималь темптар менән йәйелдерергә һәм «ашлыҡты һәр бер колхоздың, һәр бер совхоздың государствоға иген тапшырыуҙа кен һайын ҡатнашыуын, артта ҡалыусы колхоздарға, совхоздарға һәм райондарға айырата иғтибар биреп, уларҙың иген тапшырыу планын тулыһынса менән үтәп еткәнгә тиклем партия һәм совет ойошмаларының етәкселек йоғонтоһо аҫтында булыуҙарын тәьмин итергә тейешбеҙ».

Партияның район комитеттәре, район Советы башҡарма комитеттәре, МТС, совхоз, колхоз һәм әҙерләү ойошмалары етәкселәренең иген әҙерләүҙе үткәреү һәм государство интерестарын ныҡ һаҡлау өсөн государство яуаплылығы тойғоһо менән һуғарылыуҙары талап ителә.

Государство интерестарын ныҡ һаҡлау—иген әҙерләүҙә государствоға ҡаршы практика фактыларын ҡыйыу рәүештә сереү тигән һүҙ. Үткән йыл республиканың ҡайһы бер райондарында ундай фактылар күп кенә булдылар. Әле урожайлылыҡты билдәләү осоронда, йәғни иген әҙерләүгә башланғанға тиклем айырым колхоздарҙың һәм совхоздарҙың етәкселәре бөртөклө ашлыҡ культураларының урожайлылығын кәм күрһәтеп, государствоны алдарға маташтылар.

Урожайлылыҡты кәметеү юлы менән колхоздарҙа һәм совхоздарҙа рвач элементтарҙың государствоға игенде аҙыраҡ бирергә тырышыуҙарын, игенде юғалтыу, урлау һәм туҙҙырыу өсөн яуапһыҙлыҡ обстановкаһы тыуҙырылыуын аңлауы ҡыйын түгел. Шуға күрә партия һәм совет ойошмалары урожайлылыҡты кәметеп күрһәтеүҙә ғәйеплеләрҙе ҡаты рәүештә фаш итергә һәм уларҙы государствоны алдаусылар сифатында яҙаға тарттырырға тейештәр.

Республика колхоздарында иген әҙерләү осоронда ҡайһы бер колхоздарҙың государствоға күләме [illegible]ген тапшырылыуы менән иҫәпләшмәйенсә, игенде колхоздың эске ихтыяждарына расходлау фактылары күп булды.

Ҡайһы бер партия һәм совет работниктәре, колхоз председателдәренең государствоға ҡаршы был хәрәкәттәрен тамырынан бөтөрөү урынына, ҡайһы саҡта уларҙы үҙҙәре игенде туҙҙырыу юлына этәрҙеләр.

Республика партия һәм совет ойошмаларының бурыстары ағымдағы йылда ундай хурлыҡлы хәлдәрҙең ҡабатланыуын булдырмауҙан һәм колхоз игенен туҙҙырыуҙарҙан һаҡлауҙан тора.

Ашлыҡ һуғыуҙың тәүге көндәренән үк игенде тәүлек әйләнеһенә таҙартырға һәм дымлыһын киптерергә кәрәк.

Башҡортостан колхоздары һәм совхоздары иген менән бер рәттән государствоға ауыл хужалығының күп кенә башҡа продукттарын: картуф, йәшелсә, бесән, майлы һәм техник культураларҙы тапшырырға тейештәр. Үткән йыл беҙ был культураларҙы әҙерләүҙең государство планын үтәй алманыҡ.

Ағымдағы йыл урожайынан бесән, картуф, йәшелсә, майлы һәм техник культуралар әҙерләү планын уңышлы үтәү өсөн партия, совет ойошмалары һәм колхоз етәкселәре тарафынан был мөһим эшкә ярапһыҙ ҡараштың бөтөрөлөүе кәрәк.

ВКП(б) Өлкә комитеты һәм республиканың Министрҙар Советы майлы, техник культуралар, картуф, йәшелсә, бесән әҙерләүҙең государство планын ваҡытында үтәү өсөн партияның район комитеттәре [illegible]

(Аҙағы 3-сө биттә).

ВКП(б)-ның Башкортостан Өлкә Комитете пленумы

Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауҙа һәм иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында

(Аҙағы. Башы 2-се биттә).

...тәренә, район Советә башҡарма комитеттәренә һәм Әҙерләүҙәр Министерствоһының вәкилдәренә ҡарата талапты көсәйтергә бурыслылар.

Әҙерләүҙәр аппараттары, бигерәк тә Заготзерно работниктәре уткән йыл ҙур кәмселектәр менән эшләнеләр, тупаҫ боҙоуҙар ебәрҙеләр һәм колхоздарҙан иген ҡабул иткәндә хаталарға юл ҡуйҙылар. Әҙерләү пункттарынан игенде законһыҙ ҡайтарып биреү фактылары булды (Стәрлетамаҡ элеваторы һәм башҡа элеваторҙар). Иген әҙерләүҙең иң ҡыҙыу ваҡытында ҡайһы бер пункттарҙың мөдирҙәре үҙ белдектәре менән иген ҡабул итеүҙе туҡтаттылар. Заготзерноның күп кенә пункттарында был пункттар работниктәренең ғәйебе менән транспорттар тик торҙо.

Партияның район комитеттәре, район Советә башҡарма комитеттәре һәм әҙерләү ойошмалары иген һәм башҡа ауыл хужалығы продуктылары һалыу өсөн материаль-техник базаны ваҡытында әҙерләү тураһында хәстәрлек күрергә бурыслылар.

Складтарҙы, сушилкаларҙы, орлоҡ таҙартҡыс машиналарҙы, әҙерләү пункттарына тимер юлдан һәм ат менән килеү юлдарын төҙөү һәм ремонтлау республика партия, совет һәм әҙерләү ойошмаларының иғтибар үҙәгендә торорға тейеш.

Шуға ҡарамаҫтан, был эштәр бөтә әҙерләү ойошмаларында һәм бигерәк тә Заготзернола сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек алып барылалар.

Иген һәм башҡа ауыл хужалығы продуктыларын ҡабул итеү пункттарын әҙерләүҙәге хәлде тиҙерәк төҙәтеү өсөн әҙерләү ойошмаларының эше өҫтөнән контролде көсәйтергә һәм иген тапшыра башлағансы бөтә материаль-техник базаны ваҡытында әҙерләү эшенә ярҙам итергә кәрәк.

Иген әҙерләүҙе тиҙерәк үткәреү ҡабул итеү пункттарына иген сығарыу өсөн транспортты үҙ ваҡытында әҙерләүгә һәм колхоздарҙың транспорт бригадаларына кешеләр һайлап алыуға бик ныҡ бәйләнгән. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, үткән йыл күп кенә райондарҙа был эшкә тейешле иғтибар бирелмәне. Ҡайһы бер колхоздар игенде тик государство транспорты менән генә ташырға иҫәп тоттолар, ә үҙҙәренең йөнле тартыу транспортын әҙерләмәнеләр һәм ҡабул итеү пункттарына иген сығарыу өсөн тулыһынса файҙаланманылар. Был хатаны ағымдағы йылда ла ҡабатламаҫ өсөн, хәҙер үк әҙерләү пункттарына иген сығарыу өсөн колхоздарҙа транспорт бригадалары ойоштороуға тотонорға, уларға иң яҡшы, ышаныслы колхозсыларҙы һайлап алырға һәм иген әҙерләүгә башлағанға тиклем колхоздарҙың транспорт средстволарын ваҡытында әҙерләп ҡуйырға кәрәк.

Яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә күп кенә ҡала предприятиелары, учреждениелары, ойошмалары колхоздарға һәм МТС-тарға серьез ярҙам күрһәттеләр. Партия ҡала комитеттәренең предприятие һәм учреждениелар партия ойошмаларының бурысы был ярҙамды урожай йыйнау һәм иген әҙерләү ваҡытында көсәйтеүҙән тора.

Урожай йыйнау һәм иген әҙерләү — бөтә халыҡ эше. Был мөһим хужалыҡ-политик кампанияларҙы уңышлы үткәреү эшендә ҡалалар ауылға ҙур ярҙам күрһәтергә тейештәр. Республиканың промышленность Министерстволары, тәьмин итеү, сауҙа һәм транспорт ойошмалары ауыл хужалығына ҡарата үҙҙәренең йөкләмәләрен ваҡытында үтәргә бурыслылар.

— Беҙ Башҡортостан хеҙмәтсәндәре тарафынан иптәш Сталинға яҙған хатта алған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәштең хәл иткес һәм ҡатмарлы осоро алдында — урожай йыйнау һәм иген әҙерләү алдында торабыҙ, — ти иптәш Каменев үҙенең докладын тамамлап. — Хәл иткес этапта алда торған бурыстарҙың ҡатмарлы булыуы, шулай уҡ урожай йыйнауҙа хеҙмәткә яраҡлы бөтә кешеләрҙең ҡатнашыуы партия ойошмаларынан ауылда ойоштороу һәм массовый-политик эште тағы ла күтәреүҙе, уны тәьҫирлерәк һәм йәнлерәк итеүҙе талап итә.

Хәҙер беҙ үҙебеҙҙең йоғонтобоҙ менән ауыл хужалығының һәр бер работнигын солғап алырға һәм һәр бер колхозсының, МТС һәм совхоз эшсеһенең иптәш Сталинға биргән вәғәҙәләрҙе үтәү өсөн көрәштә үҙенең бурысын аңлауына һәм үҙенең бөтә көсөн биреп эшләүенә өлгәшергә тейешбеҙ.

Беҙҙең политик агитациябыҙ аңлатыу, төшөндөреү менән бергә, ялҡауҙарҙы, рвачтарҙы, брак эшләүселәрҙе ҡырҡыу рәүештә фаш итергә һәм колхоздарҙың, МТС-тарҙың, совхоздарҙың алдынғы кешеләре тәжрибәһендә ауыл хужалығының уттай ҡыҙыу эш ваҡытында нисек эшләргә кәрәк икәнлеген күрһәтергә тейеш. Тик боевой политик агитация ғына колхоздарҙа һәм совхоздарҙа ауыл хужалығы эштәренең барышына тәьҫирле йоғонто яһай аласаҡ.

Беҙ, колхоз, МТС, совхоз тауге партия ойошмаларын артабан нығытыу, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, пар күтәреү, бесән сабыу, урожай йыйнау һәм иген әҙерләү планын срогынан алда уңышлы үтәү өсөн көрәштә уларҙың ролдәрен күтәреү өҫтөндә һәр ваҡыт эшләргә бурыслыбыҙ. Беҙ өлкә партия ойошмаһының һәр бер тауге партия ойошмаһы, һәр бер коммунист иптәш Сталинға яҙған хатта ҡабул ителгән йөкләмәләрҙе уңышлы үтәү өсөн көрәштән дә хәҙер мөһимерәк һәм почетлыраҡ бурысыбыҙ юҡ икәнлеген аңлауҙарына өлгәшергә тейешбеҙ.

Иптәш Каменевтең докланы буйынса фекер алышыуҙар

Республика колхоздарында һәм совхоздарында яҙғы сәсеүҙең йомғаҡтары һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙә, урожай йыйнауҙа һәм иген әҙерләүҙә партия ойошмаларының бурыстары тураһында иптәш Каменевтең докланы буйынса фекер алышыуҙарҙа беренсе булып ВКП(б)-ның Балтач район комитете секретаре иптәш **Вәлишин** сығыш яһаны. Ул үҙенең телмәрендә колхозсыларҙың, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың, МТС работниктәренең юғары урожай үҫтереү, иген тапшырыу планын срогынан алда һәм арттырып үтәү өсөн тырышып эшләүҙәре тураһында һөйләне.

— Беҙҙең районның ауыл хужалығы артелдәрендә, — ти иптәш Вәлишин, — 518 звено, 220 баҫыусылыҡ бригадаһы ойошторолған. Улар юғары урожай яулап алыу өсөн үҙ-ара ярышып эшләйҙәр. Шуның һөҙөмтәһендә бөртөклө ашлыҡ культуралары буйынса яҙғы сәсеү планы арттырылып үтәлде.

Һәбан ашлыҡ культураларын утау, пар һөреү, урожай йыйнауға әҙерлек эштәренең барышындағы серьез етешһеҙлектәргә туҡталып, иптәш Вәлишин Ҡарыш һәм Балтач МТС-тарында МТМ-дарҙың булмауы тураһында һөйләй. МТС-тарҙа яғыулыҡ өсөн кәрәкле һандә мискәләр юҡ. Был мәсьәләләрҙе хәл итеүҙә Башҡортостан Ауыл хужалығы Министерствоһы ярҙам итергә тейеш.

— Беҙ, — ти ВКП(б)-ның Бөрө район комитете секретаре иптәш Русанов, — быйыл сәсеү майҙанын 9 мең гектарға, шуның эсенән яҙғы бойҙай майҙанын 6 мең гектарға киңәйтергә йөкләмәләр алдыҡ. Уларҙы беҙ уңышлы үтәнек. Арыш сәсеү буйынса беҙ һуғышҡа тиклем кимәлде уҙып киттек, бойҙай сәсеү буйынса ул кимәлгә етеп киләбеҙ.

ВКП(б) район комитетенең ауыл хужалығына етәкселек итеү стиленең үҙгәреүен әйтергә кәрәк. Хәҙер беҙ колхоздарға вәкилдәр ебәрмәйбеҙ. Район комитете партияның эске эштәрен һәм массовый-политик эштәрҙе үткәреүгә, тауге партия ойошмаларының эшен көсәйтеүгә күберәк иғтибар бирә.

Артабан иптәш Русанов Башсоюздың, тракторосбыт, сельхозснаб етәкселәренең ауыл хужалығы работниктәренең бик мөһим ихтыяждарын ҡәнәғәтләндереүҙә аҙ хәстәрлек күреүҙәре тураһында туҡтала.

Хеҙмәтсәндәр депутаттарының Бишбүләк район Советә башҡарма комитете председателе иптәш Осипов БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһының насар эшләүен, райондарға йомшаҡ ярҙам итеүен тәнҡитләй.

— Министерство етәкселәре, — ти иптәш Осипов, — ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы талап иткәнсә дифференциаль етәкселек итмәйҙәр. Беҙҙең район бер нисә йылдар буйынса яҙғы сәсеүҙе үткәреүҙә һәм иген әҙерләү планын үтәүҙә артта ҡалып килә. Шуға ҡарамаҫтан, Ауыл хужалығы министре иптәш Денисовтың да, уның урынбаҫарҙарының да беҙҙең районда булғандары, артта ҡалыу сәбәптәрен тикшергәндәре юҡ.

Иптәш Осипов Министерствоның Бишбүләк районына йомшаҡ ярҙам күрһәтеүе тураһында бер нисә миҫал килтерә.

ВКП(б)-ның Стәрлетамаҡ район комитете секретаре иптәш **Крупеня** урожай йыйнауға әҙерлек мәсьәләләренә туҡталып, Өлкә Комитетенең иғтибарын урожай йыйнау ябай машиналары өсөн запас частәр табыуҙа серьез ҡыйынлыҡтар булыуына юнәлтә.

— Лобогрейкаларға, урғыстарға запас частәр табып ҡарағыҙ, — ти иптәш Крупеня. — Таба алмаҫһыңыҙ. Ә уларҙы Башҡортостан предприятиелары эшләй алалар бит. Колхозсылар һатып алыу өсөн салғы, ураҡ таба алмайҙар. Ә улар бөтәһе лә урожай йыйнауҙа кәрәкле нәмәләр.

Башҡорт АССР-ы Верховный Суды председателе иптәш **Ханнанов** үҙенең сығышын Заготзерно кадрҙарын дөрөҫ һайлап алыу, государство игененең ныҡлы һаҡлау өсөн уларҙың яуаплылыҡтарын күтәреү мәсьәләһенә арнаны. Ул, район етәкселәренең ғәмһеҙлегенән файҙаланып, Заготзерно системаһына эшкә кереп алған жуликтәрҙең игенде туҙҙырыуҙары тураһында күп кенә фактылар килтерҙе.

— Иген ҡабул итеүсе ойошмаларҙың материаль-техник базаһын әҙерләү — государство әһәмиәтендәге мөһим эш, — ти СССР Әҙерләүҙәр Министерствоһының БАССР буйынса вәкиле иптәш **Казикеев**. — Шуға ҡарамаҫтан, ул сиктән тыш ҡәнәғәтләнмәҫлек алып барыла.

Ваҡытлы ойошторолған эске пункттарҙан иген сығарыу менән хәл бик тревогалы. Уларҙа әле үткән йыл һалынған игендең 50 проценте ята. Союззаготтрансың, колхоздарҙың машиналары һәм ылауҙары был маҡсатта тейешенсә файҙаланылмай. Эске пункттарҙағы иген боҙолоу ҡурҡынысы аҫтында. Игенде государство келәттәренә сығарыу — кисектергеһеҙ бурыс. Уны иң яҡын көндәрҙә хәл итергә кәрәк.

Мин шулай уҡ район ойошмалары етәкселәренең иғтибарҙарын колхоздарҙың складтарын һәм келәттәрен әҙерләүҙең мөһимлегенә юнәлтәм. Орлоҡ таҙартҡыс машиналар тураһында ла хәстәрлек күрергә кәрәк. Уларҙың етерлек булмауҙары һәм әҙерлекһеҙлектәре арҡаһында үткән йыл һуғылған иген колхоз ырҙындарында тотолоп торҙо.

«Һуғыштан һуңғы осорҙа ауыл хужалығын күтәреү саралары тураһындағы» ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарары БАССР Ауыл хужалығы Министерствоһы һәм ҡайһы бер өлкә ойошмалар тарафынан тейешенсә тормошҡа ашырылмайҙ — ти ВКП(б)-ның Ҡырмыҫҡалы район комитете секретаре иптәш Зәйнетдинова. — Беҙҙең районда бөтә сәсеүлектәрҙең 12 проценттен күп хеҙмәт һалыуҙы талап иткән культуралар тәшкил итә. Улар эсенән картуф — бер мең гектар, шәкәр сөгөлдөрө — 2 мең гектар. Ләкин өлкә ойошмалар һәм, иң беренсе нәүбәттә, Ауыл хужалығы Министерствоһы хужалыҡ сараларын планлаштырғанда беҙҙең райондың специфик үҙенсәлектәрен иҫәпкә алмайҙар. Ауыл хужалығы Министерствоһының работниктәре Ҡырмыҫҡалы МТС-ында ремонт базаһының, столовой, торлаҡ өсөн бинаның, клубтың булмауын беләләр, ләкин ярҙам итмәйҙәр.

Шефлыҡ итеүсе ойошмалар тураһында бер-ике һүҙ. Беҙҙең район колхоздары өҫтөнән Өфө ҡалаһы Киров районының учреждениелары һәм предприятиелары, ойошмалары шефлыҡ итәләр. Әйтергә кәрәк, уларҙың ҡайһы берҙәре — урындағы промышленность Министерствоһы, связь управлениеһе, Мәғариф Министерствоһы үҙҙәре шефлыҡ иткән ауыл хужалығы артелдәренә кәрәкле ярҙамды күрһәтәләр. Ләкин Социаль тәьминәт Министерствоһы, Верховный Суд ойошмалары был серьез эшкә формаль ҡарайҙар.

— Большевиктәр партияһы, Совет Хөкүмәте, — ти Дәүләкән МТС-ы директоры, Социалистик Хеҙмәт Геройы иптәш **Павлов**, — беҙҙең коллективебеҙҙең хеҙмәтен юғары баһаланы. 1947 йылда уңышлы эшләгән өсөн 37 кеше хөкүмәт наградаларын алды. Уларҙың дүртеһенә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде. Хөкүмәт ҡарары буйынса беҙҙең МТС үткән йыл өлгө МТС-ҡа әйләндерелде. Былар бөтәһе лә беҙҙән башҡаларға өлгө күрһәтерлек итеп эшләүҙе талап итә.

Яҙғы баҫыу эштәрен беҙ ҡыҫҡа срокта һәм сифатлы итеп үткәрҙек. МТС хеҙмәтләндергән колхоздарҙа бөтәһе 15.892 гектар ашлыҡ сәстек. Юғары урожай өсөн фундамент һалынды. Комбайндар, молотилкалар тулыһынса ремонтландылар. Беҙҙең коллектив иптәш Сталинға биргән вәғәҙәбеҙҙе үтәү өсөн бөтә көсөн һаласаҡ.

Көйөргәҙе районы «Золотой колос» колхозы звеноводы иптәш **Чуева** үҙе етәкселек иткән звеноның һәр бер гектарҙан 30-ар центнер бойҙай урожайы алырға биргән йөкләмәһен үтәү өсөн ныҡышмалы көрәшеүе тураһында һөйләне.

— ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын үтәй барып, — тине партияның Кушнаренко район комитете секретаре иптәш **Бердин**, — беҙ элекке артта булған күп кенә колхоздарҙы алдынғылар сафына сығара алдыҡ.

Әлбиттә, көсһеҙерәк колхоздарға ярҙам күрһәтеү буйынса беҙгә әле байтаҡ эшләргә тура киләсәк. Ул колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуға айырыуса иғтибар бирергә кәрәк. Ауыл хужалығы артелдәрендә общественный производствонан баш тартып йөрөүсе, хатта билдәләнгән минимум хеҙмәт көнө лә эшләмәүсе члендар бар.

ВКП(б)-ның Көйөргәҙе район комитете секретаре иптәш **Шамандрин** пленумға үҙҙәренең районында яҙғы сәсеүҙең оҙаҡҡа һуҙылыуының сәбәптәре тураһында һөйләне. Уның һөйләүенә ҡарағанда, сәсеүҙең оҙаҡҡа һуҙылыуының сәбәбе — уларға ваҡытында орлоҡ бирмәүҙә. Көйөргәҙе районы өсөн билдәләнгән тракторҙарҙың килеп етмәүендә, орлоҡто тиҙерәк ташыу өсөн транспорттың етерлек булмауында һәм башҡалар.

Башсоюз Президиумының председателе иптәш **Динмөхәмәтов** урындағы промышленность етәкселәренә ошондай талаптар менән сығыш яһаны: улар киң ҡулланыу тауарҙарының сифатын яҡшыртырға өлгәшергә, уларҙың ассортименттәрен күбәйтергә тейештәр. Иптәш Динмөхәмәтов район партия работниктәренән сауҙа кадрҙары менән тәрбиә эшен ойоштороруға, Башсоюзға ярҙам итергә һораны.

— СССР Министрҙәр Советә һәм ВКП(б) Үҙәк Комитете колхоздарҙың государство ярҙамына ғына ышанып, үҙҙәрен үҙ орлоҡтары менән тәьмин итеү өсөн хәстәрлек күрмәүҙән торған зарарлы практикаһын ҡаты ғәйепләне, — ти БАССР Ауыл хужалығы министре иптәш **Денисов**. — Ләкин шунан һуң да урындарҙа ауыл хужалығы органдары работниктәре, совет һәм партия ойошмалары орлоҡ тураһында тик сәсеү башланыр алдынан, йәки сәсеү ваҡытында ғына уйлай башлайҙар. Шуның һөҙөмтәһендә орлоҡто табыу һәм бүлеү өсөн күп ваҡыт әрәм була, ташыу өсөн күп аҡса түгелә, транспорт файҙаланыла, ергә йыш ҡына насар орлоҡтар сәселә, ә ҡайһы саҡта орлоҡ юҡлыҡтан сәсеү һуҙылай йәки өҙөлә.

Ул бөртөклө ашлыҡ культуралары менән генә шулай түгел. Уны беҙ ссуда тәртибендә йыл һайын күп алабыҙ. Ә майлы, техник, тамыр аҙыҡ, йәшелсә культуралары орлоҡтарына килгәндә инде, уларҙы тулыһы менән тип әйтерлек икенсе өлкәләрҙән һәм республикаларҙан алабыҙ. 1948 йылда беҙҙә кенбағыш орлоғо 41 процент, етен — 28, киндер — 23, рыжик — 35, тамыр аҙыҡтар — 2, бер йыллыҡ үләндәр орлоғо 17 процент кенә тәшкил итте, Ә шәкәр сөгөлдөрө, күк һағыҙ һәм махорка орлоғо бөтөнләй булманы.

Ә бит беҙҙең ерҙәребеҙ, климат шарттары үҙебеҙҙә үҫтерелә торған бөтә ауыл хужалығы культураларының орлоҡтарын етештереү өсөн бик яҡшы. Уның шулай икәнлеген күп колхоздар миҫалында күрһәтеп була.

Үкенескә ҡаршы, беҙҙең республикала үҙҙәрен тәьмин итерлек орлоҡ етештереүгә өлгәшкән колхоздар аҙ әле. Иждивенселек настроениеһе киң таралған һәм ныҡ йәшәй. Орлоксолоҡ хужалығына бөтөнләй түҙмәҫлек рәүештә мөнәсәбәт итеүҙе Кушнаренко районы миҫалында күреп була. Бында орлоҡ участкаларын бүлеү һәм рәсмиләштереү, ул участкаларҙа сәсеү сифаты өҫтөнән контролдең ойошторолмауы тикшереүҙәр менән раҫланды.

Орлоҡ участкаларын даими звеноларға ныҡ беркетергә, звеноларҙы алдынғы колхозсылар менән көсәйтергә, звеноларҙың эш планын төҙөргә кәрәк һәм уларға инвентарҙәр беркетелергә тейеш.

Артабан иптәш Денисов орлоҡ участкаларында урожай йыйнауҙа колхоздарҙың, совхоздарҙың, ер органдарының бурыстарына туҡтала.

Башҡортостан Заготзерно контораһы управляющиеның урынбаҫары иптәш Слетев сығышында үҙ системаларындағы кадрҙарҙы яҡшыртыу, улар араһында тәрбиә эштәрен көсәйтеү, кадрҙарҙың эшмәкәрлегенә контроль һәм иген тапшырыу ваҡытына материаль-техник әҙерлектәр бурысына туҡталды.

— ВКП(б) Үҙәк Комитете һәм ССР Союзы Хөкүмәтенең беҙҙең республика ауыл хужалығына күрһәткән һәр ваҡыт үҫә барыусы ярҙамына, — ти ВКП(б) Өлкә Комитетенең ауыл хужалығы бүлеге мөдире иптәш **Нуриев**, — иң яҡшы яуап ағымдағы йылда бөтә колхоз һәм совхоздар тарафынан государствоға ауыл хужалығы продуктылары тапшырыу буйынса йөкләмәләрҙе срогынан алда үтәү буласаҡ.

Хөкүмәттең тракторҙар, орлоҡ менән ярҙам күрһәтеүе арҡаһында, Башҡортостан колхоздары һәм совхоздары 1948 йылда яҙғы сәсеүҙе, үткән йылға ҡарағанда, ойошҡанлыраҡ үткәрҙеләр һәм ауыл хужалығы культуралары сәсеүлектәре структураһын күренекле яҡшырттылар. Яҙғы бойҙай сәсеү, үткән йылға сағыштырғанда, 300 мең гектарға артыуы, ә бөртөк ашлыҡтар йыйыу майҙаны 1947 йылға сағыштырғанда, 400 мең гектарға артыуы ғына күрһәтеү ҙә быны раҫлау өсөн етә.

Шулай итеп, 1948 йылда иген һәм башҡа ауыл хужалығы продуктыларын тапшырыу пландарын, үткән йылға ҡарағанда, уңышлы үткәреү өсөн республикаға уңайлы шарттар тыуҙырылды. Ләкин, ниндәй генә уңайлы шарттар булмаһын, государство келәттәренә иген үҙенән-үҙе аҡмаясаҡ. Ауыл хужалығы продуктыларын әҙерләүҙең уңышы әҙерләү ойошмаларының эштәре яҡшы ҡуйылыуға бәйләнгән. Уларҙың һәм бөтә совет, партия ойошмаларының алдында — яңы урожайҙы ҡабул итеүгә материаль-техник базаны алдан әҙерләү, һынаған кадрҙарҙы үҙ ваҡытында һайлап алыу һәм әҙерләү аппараттарын улар менән комплектовать итеү бурыстары тора.

Ләкин, иген әҙерләү ойошмаларының материаль-техник базаларын әҙерләү барышы ҙур ҡурҡыныс тыуҙыра. 10 июнгә Заготзерно буйынса складтар 46 процентка, продрезервтәр буйынса — 26 һәм Главзаготсортзерно буйынса — 56 процентка генә ремонтланған.

Заготзерноның әҙерләү пункттарына, колхоз һәм совхоздарҙа асылырға уйланған тәрән пункттарҙан тыш, 224 тауар үлсәүҙәре, 158 пурка, 84 техник үлсәүҙәр, 154 дымлыҡ үлсәүҙәре етешмәй. Булған үлсәүҙәр хужалығы һәм лабораториялар ҙа бик әкрен ремонтланалар, ремонттың сифаты насар.

Күп кенә пункттарҙа иген киптергестәр бик әкрен ремонтлана, ә иген киптергестәргә яғыулыҡ әҙерләү өҙөлгән, тип әйтергә мөмкин. Иген киптергестәрҙең нормаль эшләүҙәрен тәьмин итергә кәрәк булған 16,5 мең кубометр утындың бары 4 мең кубометры әҙерләнгән һәм урындарға килтерелгән.

Мин юғарыла килтерелгән фактылар әҙерләү ойошмаларының яңы урожай игенен ҡабул итеүгә әҙерлектәрендә сиктән тыш ауыр хәл килеп тыуыуы тураһында һөйләйҙәр.

Әҙерләү ойошмаларының яңы урожайҙан иген ҡабул итеүгә әҙерлек эштәрендә етешһеҙлектәре бик ҙур, ләкин был ойошмалар үҙҙәрендә булған бөтә резервтәрҙе белеп файҙаланһалар, яңы иген әҙерләү кампанияһы башланғанға тиклем материаль-техник шарттарҙы уңышлы әҙерләргә мөмкин.

Әҙерләү ойошмалары элеваторҙарҙы, механик келәттәрҙе һәм складтарҙы ремонтлауҙы 15 июлдән дә һуңға ҡалмай тамамлай алалар һәм тейештәр. Бының өсөн ныҡышмалы эшләргә генә кәрәк.

Заготзерно һәм элеваторҙарҙың партия ойошмаларының эшен серьез йәнләндерергә, әҙерләүсе работниктәр араһында политик эште яҡшыртырға һәм уларҙы был ойошмаларҙа әле йәшәп килгән таркаулыҡтарға ҡаршы көрәшкә күтәрергә кәрәк.

Үҙ хужалығында яҙғы сәсеү ваҡытында өлгәшелгән уңыштар тураһында һөйләгәс, Бүздәк бөртөклө ашлыҡ совхозының директоры иптәш **Бевзенко** урожай йыйнау, государствоға иген тапшырыу ваҡытындағы ҙур һәм яуаплы бурыстарға туҡталды.

— Урожай йыйнау ваҡытында, — ти ул, — техниканы тулы файҙаланыу менән бергә, бик күп һандә эшсе көстәр ҙә кәрәк. Ашлыҡ йыйнауға яҡшы әҙерләнергә, эш ваҡытында оҫта файҙаланыу өсөн бөтә көстәрҙе һәм резервтарҙы алдан уҡ иҫәпкә алырға кәрәк.

Иптәш Бевзенко өҫтәмә комбайндар һәм үлсәү хужалығы алыуҙа Өлкә Комитеттән ярҙам итеүҙе һораны.

— Быйыл беҙҙең республиканың колхоздарында, МТС һәм совхоздарында яҙғы сәсеү йомғаҡтары, — ти БАССР Министрҙәр Советә Председателенең урынбаҫары иптәш **Ермолаев**, — партия, совет ойошмалары һәм ауыл хужалығы органдарының, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы тарихи ҡарарын үтәп, бер ни тиклем ыңғай һөҙөмтәләргә өлгәшеүҙәре тураһында һөйләйҙәр.

Ләкин, колхоздарҙы нығытыу буйынса эштәрҙәге етешһеҙлектәрҙе күрмәү кисектермәҫлек хата булыр ине. Яҙғы сәсеү планын арттырып үтәгән Яңауыл, Туймаҙы, Салауат һәм башҡа райондар менән бер рәттән, яҙғы культуралар сәсеүҙең государство планын үтәмәгән: Иомағужа, Архангель, Малаяз, Күгәрсен, Иәрмәкәй, Оло-Тиләк, Илеш райондары ла бар. Һөҙөмтәлә, Башҡортостан буйынса дөйөм сәсеү планы үтәлеп етмәне.

Серьез етешһеҙлек булып күп кенә райондарҙа әле булһа техник, май, йәшелсә, баҡсасылыҡ, мал аҙығы культуралары һәм күп йыллыҡ үлән сәсеүгә иғтибарһыҙ ҡарау тора. Был культураларҙың береһе буйынса ла сәсеү планы үтәлмәне.

МТС-тар эшендә лә ҙур етешһеҙлектәр бар. Уларҙың күбеһе үҙ эштәрен ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы талаптарына ярашлы рәүештә ҡайтанан ҡормағандар әле, бригадалар эшенә тәртип индермәгәндәр һәм колхоздар менән төҙөлгән договорҙарҙы тулы үтәүҙе тәьмин итмәгәндәр. Һөҙөмтәлә трактор эштәренең төп төрҙәре буйынса план республика буйынса тотош үтәлмәне. Яҙғы сәсеү ваҡытында Ерган, Һуҡайлы, Подлуб, Ташлыкүл, Ҡалтасы һәм башҡа МТС-тар айырыуса ҡәнәғәтләнмәҫлек эшләнеләр.

Бөтә ауыл хужалығы эштәрен үҙ ваҡытында уңышлы тамамлау — һәр бер колхозда хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа, хеҙмәтте дөрөҫ ойоштороуҙа, колхозсы һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙы урожайҙы үҙ ваҡытында, сифатлы йыйнап алыуға мобилизовать итеүҙә тора. Ләкин хеҙмәт дисциплинаһы һәм хеҙмәтте ойоштороу күп кенә колхоздарҙа бик яҡшынан түгел.

1947 йылғы иҫәпкә ҡарағанда, республиканың колхоздарында эшкә яраҡлы 3128 колхозсы бер генә хеҙмәт көнө лә эшләмәгән, ә 83.650 эшкә яраҡлы колхозсы билдәләнгән минимум хеҙмәт көнөн үтәмәгән. Айырым райондарҙың колхоздарында хеҙмәт дисциплинаһы бигерәк тә насар. Мәҫәлән, үткән йыл Маҡар районында — 470 колхозсы, Стәрлетамаҡта — 480, Әлшәйҙә — 218, Ҡырмыҫҡалыла — 259 колхозсы бер генә хеҙмәт көнө лә эшләмәгән.

Колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһы быйыл да насар әле. Үткәрелгән тикшереүҙәр Бөҙәяҙ, Миәкә һәм Саҡмағош райондарының колхоздарында быйыл да күп кенә колхозсыларҙың билдәләнгән минимум хеҙмәт көнөн эшләмәүҙәрен күрһәтте. Мәҫәлән, Бөҙәяҙ районының колхоздарында ғинуарҙан 20 майға тиклем 452 кеше эшкә бөтөнләй ҡатнашмаған. Миәкә районының «Уяҙа», Сталин, Чкалов исемендәге колхоздарында колхозсыларҙың ярты өлөшө самаһы общественный производствола ҡатнашмай.

Күп кенә райондарҙа колхозсыларҙың хеҙмәте насар ойошторолған. Төп етешһеҙлектәр шунан тора: ерҙе файҙаланыуҙа эйәһеҙлек, баҫыусылыҡ бригадаларына сәсеү әйләнеше баҫыуҙарында участкалар бөтә урындарҙа ла беркетелмәү, бригадаларҙың составындағы ағымсылыҡ бөтмәгән, хеҙмәттең звено системаһы етерлек ҡулланылмай, эшләп сығарыуға һәм хеҙмәткә түләүҙә иҫкергән һәм түбәнәйтелгән нормалар әле һаман йәшәйҙәр.

Ауыл хужалығы Министерствоһы, партия һәм совет ойошмалары хеҙмәтте ойоштороуҙа кәрәкле тәртип индерергә һәм колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын ҡырҡа күтәреү өсөн саралар күрергә тейештәр.

Иптәш Каменев докланы буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 14 кеше ҡатнашты

Һигеҙ государствоның Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшавалағы кәңәшмәһе

Совет Социалистик Республикалар Союзы хөкүмәте һәм Польша Республикаһы хөкүмәте инициативалары буйынса 23 июнда, Варшавала, СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙәренең кәңәшмәһе асылды.

Кәңәшмәлә ҡатнашалар: СССР Министрҙәр Совете Председателенең Урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов, Албанияның Премьер-Министре һәм Сит ил Эштәре Министре Э. Ходжа, Болгарияның Премьер-Министре Урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министре В. Коларов, Чехословакияның Сит ил Эштәре Министре В. Клементис, Югославияның Сит ил Эштәре Министре С. Симич, Польшаның Сит ил Эштәре Министре З. Модзелевский, Румынияның Сит ил Эштәре Министре А. Паукер һәм Венгрияның Сит ил Эштәре Министре Э. Мольнар.

Кәңәшмәлә июнь баштарында тамамланған Лондон кәңәшмәһенең Германия мәсьәләләре буйынса ҡарарҙары тураһындағы мәсьәлә тикшереләсәк.

Кәңәшмәне Польша Республикаһының Сит ил Эштәре Министре З. Модзелевский асты. Унан һуң Премьер-Министр Ю. Циранкевич кәңәшмәгә килеүсе Сит ил Эштәре Министрҙәрен ҡотланы.

Кәңәшмәлә ҡатнашыусы Сит ил Эштәре Министрҙәре Польша Республикаһы хөкүмәтенә, хөрмәт менән ҡаршылаған өсөн, рәхмәт белдерҙеләр. Беренсе ултырыштың председателе итеп Польшаның Сит ил Эштәре Министре З. Модзелевский һайланды.

В. М. Молотовтың Варшаваға килеүе

ВАРШАВА, 23 июнь. (ТАСС). СССР Министрҙәр Совете Председателенең урынбаҫары һәм СССР Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов бөгөн Варшаваға килде.

В. М. Молотовты Варшава аэродромында Польша республикаһының премьер-министре Циранкевич, Сеймдең вице-маршалы Замбровский, Сит ил Эштәре Министре Модзелевский, милли оборона министре маршал Роля-Жемерский, президенттең гражданский канцелярия начальнигы Миял, промышленность министре Минц һәм Польша хөкүмәтенең башҡа члендәре һәм шулай уҡ сит ил эштәре министерствоһының яуаплы сотрудниктәре ҡаршыланылар.

В. М. Молотовты шулай уҡ СССР-ҙың Польшалағы посолы Лебедев, СССР посольствоһының советнигы Яковлев, СССР-ҙың хәрби атташеһе генерал-майор Маслов һәм сауҙа вәкиле Лощаков иптәштәр ҡаршыланылар.

Ҡаршы алыу ваҡытында почетный ҡарауыл теҙелде. Советтәр Союзы һәм Польша республикаһының государство гимндары башҡарылды.

Аэродром Польша республикаһы һәм Советтәр Союзы байраҡтары менән биҙәлгәйне.

Төркиә мәжлесендә

СТАМБУЛ, 20 июнь. (ТАСС). 18 июнда, Төркиә мәжлесе ултырышында, премьер-министр Хәсән Сака хөкүмәттең программаһын иғлан итте. Ыҙғышыуҙарға тиклем барып еткән сығыштарҙа бөтәһе 17 депутат ҡатнашты.

Демократик партия исеменән, программаны тәнҡит итеп, Исмәғил Хәкки Чалик, сығыш яһап, әлекке кабинет илдә демократияны үҫтереү тураһындағы үҙенең вәғәҙәләрен үтәмәне. Бөтә эш осрала халыҡ һәм полицияның хоҡуҡтары тураһындағы 18-се статьяны юҡҡа сығарыуға ғына ҡайтып ҡалды тине. Хөкүмәттең политикаһын тәнҡитләп оратор, әйбер хаҡтарын төшөрөү урынына, хаҡтарҙың күтәрелеүе күренә, тине. Икмәккә кукуруза, һоло һәм арпа ҡушылыуға ҡарамаҫтан, бойҙай икмәге менән бер хаҡҡа һатыла. Хөкүмәт крәҫтиән халҡы шундай кәрәкһенгән ауыл хужалығы машиналарын индермәне. Илдә сығарылған ауыл хужалығы ҡоралдары, үҙҙәренең сифаты менән, сит илдән килтерелгән ҡоралдарға ҡарағанда, насар булыуға ҡарамаҫтан, хаҡтары ҡиммәтерәк. Хөкүмәт, власть башында 9 ай булыуына ҡарамаҫтан, экономик ҡыйынлыҡтарҙы бөтөрмәне, тине.

Бойондороҡһоҙ депутат Әхмәт Огуз хөкүмәттең экономик политикаһын тәнҡитләне. Хөкүмәт, тине ул, социаль проблемаларҙы һәм тормошта ҙур әһәмиәте булған ауыл хужалығы мәсьәләләрен хәл итеүҙән ситкә тайпылды. Илдә ҡиммәтселек хөкөм һөргәнлектән халыҡтарҙың тормошо ауыр, тип билдәләне.

Огуз үҙенең һүҙендә шулай уҡ бюджеттең дефицитле булыуын, аҡсаның һәм алтындың байлығы аҙая барыуын, биржәктарҙең артыуын әйтеп үтте.

Демократик партияның депутаты Жемаль Озчобой, халыҡ демократик партияның депутаттарына мөрәжәғәт итеп, былай тине: «Һеҙ сит илгә икмәк һаттығыҙ, халыҡты ас ҡалдырҙығыҙ. Мин илдең 19 районында булып, бик насар ысын барлыҡты күрҙем. Мин Самаунда һәм Эрбазда булдым. Беҙҙә бер нәмә лә ҡалмаған. Бындай кабинет хөкүмәт эштәрен хәл итә алмай».

Сығыштар бөткәндән һуң, мәжлес кабинетҡа 308 тауыш менән ышаныс күрһәтте. 40 тауыш ҡаршы булды.

Уоллестең сығышы

НЬЮ-ЙОРК, 21 июнь. (ТАСС). Юнайтед Пресс агентствоһы хәбәрсеһенең Кливлендән хәбәр итеүенә ҡарағанда, өсөнсө партиянан президентлыҡҡа кандидат Уоллес Огайо штатындағы официаль кешеләрҙең өсөнсө партияны ноябрь һайлауҙарына штаттың һайлау бюллетененә индереүҙән баш тартыуына протест билдәһе итеп ойошторолған митингыла сығыш яһаны. Трумәндең күптән түгел генә ил буйынса сәйәхәте тамамланыуға комментарий биреп, бөтә реакцион эске политиканың ғәйебен конгресс өҫтөнә ауҙарғаны өсөн Уоллес Трумәндән көлә. «Был Трумән һөйләргә өйрәнгән телмәрҙәрҙең береһе ине, — тине Уоллес, — бөтә тәртипһеҙлектәр өсөн башҡа иптәштәрен ғәйепләүсе телмәр.

Трумәндең был тарихта иң насар конгресс булды тип белдереүен, Уоллес тикшермәйәсәкмен, тине. Ләкин ул хәҙерге эске проблемаларҙың килеп тыуыуында Трумәндең яуаплы икәнлеген билдәләне.

Огайо штаты секретаре Хаммелдең Огайо штатының һайлау бюллетененә өсөнсө партияны индереү тураһындағы петицияларҙы яраҡлы түгел, тип иҫәпләү хаҡындағы ҡарарын тәнҡитләп, Уоллес был петицияларға 46 мең кеше ҡул ҡуйҙы, тип иҫкәртте, һәм Хаммел «үҙенең Америкаға ҡаршы бөтөнләй яуапһыҙ ҡарарын ҡабул иткәндә, яңы партияның петицияларына ҡул ҡуйыусылар араһында бер нисә коммунист бар ине, тигән раҫлауҙарына һылтанды, тип өҫтәне. Шулай итеп, аҙсылыҡтың ҡул тамғаһы Хаммел өсөн ҡабул итерлек булмағас, ул бөтә 46 мең ҡул тамғаны хурлыҡҡа төшөрә. Был массовый политик үлем һәм демократияны юҡ итеүгә ынтылыу булып тора».

Иран хөкүмәтенең составы

ТЕГЕРАН, 21 июнь. (ТАСС). Хәҙер түбәндәге составта хөкүмәт ойошторҙо. Джемаль Имами — портфелһеҙ министр; Мансур-Эс-Салтане Адль портфелһеҙ министр; Муса Нури Эсфендиери — сит ил эштәре министре; генерал Ахмеди хәрби министр; Фахими — эске эштәр министре; доктор Эгбаль—мәғариф министре; Ардалан — финанс министре; Бушари—ер эштәре министре; Низам-Эс-Салтане Мафи—юстиция министре; доктор Аббас Адхам Алам-Оль-Мольк — һаулыҡ һаҡлау министре; доктор Шалман — милли экономия министре; Араете—почта һәм телеграф министре.

Эттлиҙең белдереүе

ЛОНДОН, 22 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының хәбәр итеүенә ҡарағанда, общиналар палатаһында һорауға яуап биреп, Англия премьер-министр Эттли Англияның авиация Министерствоһы аппаратынан бөтә коммунистарҙы сығарып ташлау тураһында үткән аҙнала ҡабул ителгән ҡарарҙы яҡлаһы. Ләкин был ҡарар урындағы самоуправлениеға һәм ҡоралды көстәргә ҡарата ҡулланыласаҡмы тигән һорауға яуап биреүҙән баш тартты.

Генерал Клейгә маршал Соколовскийҙең хаты

БЕРЛИН, 21 июнь. (ТАСС). Кисә Германиялағы совет хәрби администрацияһының баш начальствующие Советтәр Союзы маршалы Соколовский Американың Германиялағы губернаторы генерал Клейгә түбәндәге йөкмәткеле хат ебәрҙе:

«Ҡәҙерле генерал Клей,

мин 18 июнда яҙған хатығыҙҙы алдым. Германиялағы оккупацион ғәскәрҙәрҙең Америка, Британия һәм Франция командующийҙәре берләшергә һәм Германияның көнбайыш оккупацион зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәрергә ҡарар иттеләр, тип радио аша белдереүҙән бер нисә сәғәт элек был турала миңә хәбәр иткәйнегеҙ.

Шулай итеп, һеҙ үҙегеҙҙең законнан тыш бер яҡлы ҡарарығыҙ менән контроль советҡа белдермәйенсә һәм уның рөхсәтенән башҡа Көнбайыш Германияла сепаратный аҡса реформаһы үткәрәһегеҙ, шуның һөҙөмтәһендә аҡса әйләнешенең берҙәмлеген бөтөрәһегеҙ һәм Германияны бүлгеләүҙе тамамлайһығыҙ. Германияның берҙәмлеген емереү буйынса үҙегеҙҙең сепаратный хәрәкәтегеҙҙе аҡлау маҡсатында көнбайыш зоналарҙа экономиканың насар хәлдә булыуына һылтаныуығыҙҙы мин ҡабул итә алмайым. Дөйөм Германия аҡса реформаһын үткәреү буйынса контроль советы органдарында дүрт яҡлы килешеүгә нигеҙҙә өлгәшелгәнлеге һеҙгә билдәле. Был килешеү хәҙер әҙелдә.

Һеҙҙең миңә яҙған хаттағы иң яҡын киләсәктә Германияла берҙәм аҡса индереү тураһында оккупацион властар араһында килешеүгә өлгәшеү мөмкинлеге күрһәтеүсе белдереүегеҙҙе Германияның көнбайыш зоналарында һеҙҙең тарафтан сепаратный аҡса реформаһы үткәреүгә хәрәкәттәрегеҙ менән нисек бәйләнешле булыуы миңә аңлауы ҡыйын икәнлеген әйтергә тейешлемен. Һеҙҙең практик хәрәкәттәрегеҙ был мәсьәләлә герман халҡының ышаныуын емерҙеләр һымаҡ тойола.

Көнбайыш Германияла сепаратный аҡса реформаһы үткәреү тураһындағы ҡарарығыҙҙы практик рәүештә тормошҡа ашыра башлаған ваҡытта ғына һеҙ был турала миңә белдерҙегеҙ. Был хәл, һис шикһеҙ, совет оккупацион властарын ҡыйын хәлгә ҡуя һәм Германияның совет оккупацияһы зонаһында немец халҡының һәм экономикаһының интерестарен һаҡлап ҡалыу өсөн йәһәт һәм кәрәкле саралар үткәрергә мине мәжбүр итә.

Һеҙ миңә ебәргән хатығыҙҙа: Һеҙҙең тарафтан үткәрелгән саралар «Берлинде бер бөтөн итеп дүрт яҡлы идара итеү мәсьәләһендә йәшәп килгән специфик шарттар арҡаһында ҡаланың Америка секторына ҡағылмай», — тип яҙаһығыҙ.

Һеҙҙең быңлай белдереүегеҙ ғәжәпләнеү генә тыуҙыра, сөнки бөтә Германия менән дүрт яҡлы идара итеү тураһында халыҡ-ара килешеүҙәр бар. Ул турала һеҙ әйтмәүҙе артыҡ күрәһегеҙ, ә Берлин менән дүрт яҡлы идара итеү бөтә Германия өсөн союзный контроль механизмы тураһындағы килешеүҙең бер өлөшө булып тора.

Германиялағы контроль механизм тураһындағы килешеүҙе емереүгә йүнәлдерелгән һеҙҙең хәрәкәттәрегеҙҙе мин тулы хоҡуҡлы тип таный алмайым һәм шундай хәрәкәттәр өсөн бөтә яуаплылыҡ Америка, Британия һәм Франция властары өҫтөнә төшөүен белдерергә тейешлемен.

Шуның менән бергә, көнбайыш зоналар өсөн иғлан ителгән сепаратный аҡса реформаһы Берлиндең Америка секторында үткәрелмәйәсәк, тип һеҙҙең белдереүегеҙҙе мин ғәжәпләнеү менән ҡабул итәм. Мин был үҙенән-үҙе аңлашыла тип иҫәпләйем, сөнки Берлинда бер төрлө генә аҡса йөрөргә тейеш. Берлинға ике төрлө аҡса индереү совет оккупацияһы зонаһында һәм уның экономик өлөшө булған Ҙур Берлин районында экономиканы һәм аҡса әйләнешен өҙөп кенә ҡалмайынса, бәлки совет оккупацияһындағы зонаның экономикаһын өҙәр ине. Совет оккупацион властары халыҡ-ара договорҙар менән йөкмәтелгән бурыстар арҡаһында быға юл ҡуя алмайҙар.

Көнбайыш зоналар менән совет оккупацион зонаһы араһында йәшәп килгән сауҙа мөнәсәбәттәрен һеҙҙең дауам иттерергә теләүегеҙгә килгәндә, мин уны иғтибарға алам, һәм беҙҙең зоналар араһында ул сауҙа мөнәсәбәттәрен минең һәр ваҡыт киң үҫтереү яғында торғанлығымды һеҙҙең хәтерегеҙгә төшөрөүҙең кәрәге юҡ тип уйлайым.

Һеҙгә хөрмәт менән **В. Соколовский,** Советтәр Союзы маршалы».

Ошондай йөкмәткеле хат маршал Соколовский тарафынан шулай уҡ Британия командующие генерал Робертсонға һәм Франция командующие генерал Кенигкә ебәрелде.

Генерал Клейгә маршал Соколовскийҙең хаты

БЕРЛИН, 22 июнь. (ТАСС). Германиялағы совет—хәрби администрацияһының баш начальнигы Советтәр Союзы маршалы Соколовский бөгөн Американың хәрби губернаторы генерал Клейгә түбәндәге йөкмәткеле хат ебәрҙе:

«Ҡәҙерле генерал Клей.

Германияның оккупацияланған көнбайыш зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәреү тураһында иғлан итеүсе Америка, Британия һәм Франция оккупацион властарының хәрәкәттәре миңә ышандырылған оккупацияланған зонаны ҡыйын хәлгә ҡалдырҙы. Был мине немец халҡының интерестарында, совет оккупацияһындағы зонаның һәм Ҙур Берлин районының экономикаһын хужалыҡ тәртипһеҙлегенә һәм юҡҡа сығарылған аҡса билдәләренең көнбайыш Германиянан тулыуы айҡанлы аҡса реформаһы әйләнешенә тәртипһеҙлек индереүҙән һаҡлау тураһында ҡарар ҡабул итергә мәжбүр итте. Шул сәбәпле совет зонаһында һәм Ҙур Берлин районында аҡса реформаһы үткәреү тураһында минең тарафтан ҡарар ҡабул ителде.

Германиялағы совет хәрби администрацияһы Контроль Совет рамкаларында әҙерләп алып барылған дөйөм Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһын яҡлап сыҡты. Политик һәм мораль характерҙән сығып, ул үҙ зонаһында сепаратный аҡса реформаһына әҙерләнеүҙе мөмкин тапманы. Беҙҙең хәҙерге ваҡытта алдан әҙерләнгән яңы аҡса билдәләребеҙ юҡ. Шуның өсөн дә беҙ реформаны рейхсмаркалар һәм рентмаркалар нигеҙендә, уларға махсус купондар йәбештереп, үткәрергә мәжбүр булабыҙ.

Һеҙҙең был айырым хәрәкәтегеҙ арҡаһында Берлиндең Америка секторында иркһеҙ рәүештә аҡса реформаһы үткәрергә мәжбүр булғанлыҡтан, һеҙ быға ҡомасаулыҡ күрһәтмәҫһегеҙ һәм нормаль аҡса йөрөшөн, совет оккупацияһы зонаһында булһын һәм шулай уҡ Ҙур Берлин районында булһын, хужалыҡ тормошон тәьмин итеү эшендә артыҡ ауырлыҡтар тыуҙырмаҫһығыҙ, тип ышанам.

Совет зонаһында һәм Ҙур Берлин районында аҡса реформаһы үткәреү тәртибе һәм уның шарттары Германиялағы совет хәрби администрацияһының ошо 111-се номерле приказына беркетелгән һәм минең тарафтан раҫланған, Германияның совет оккупацион зонаһында һәм Ҙур Берлин районында аҡса реформаһы үткәреү тураһындағы немец экономик комиссия тарафынан ҡабул ителгән положениела яҙылған.

Тәрән хөрмәт менән **В. СОКОЛОВСКИЙ,** Советтәр Союзы маршалы».

Ошондай уҡ йөкмәткелә хаттар маршал Соколовский тарафынан генерал Робертсонға һәм генерал Кенигкә лә ебәрелде.

Юғарыла күрһәтелгән 111-се номерле приказ йөкмәткеһе һәм аҡса реформаһы үткәреү тураһындағы положениелар алдағы телеграммаларҙа буласаҡ.

Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы

Аҡса реформаһы тураһында положение иғлан ителде

БЕРЛИН, 23 июнь. (ТАСС). Германиялағы совет хәрби администрацияһының баш начальнигы маршал Соколовскийҙең Германияның совет оккупацияһы зонаһында һәм Ҙур Берлин районында 24 июндән алып 28 июнгә тиклем аҡса реформаһы үткәреү тураһында һәм шулай уҡ немец экономик комиссияһы тарафынан ҡабул ителгән аҡса реформаһы тураһындағы положениене бөгөн немец матбуғаты һәм радиоһы дөйөм иғтибар өсөн иғлан итте.

Иғлан ителгән документта былай тип әйтелә: Германиялағы совет хәрби администрацияһының баш начальнигы үҙенең 23 июндәге приказында немец экономик советы тарафынан әҙерләнгән «Аҡса реформаһы тураһындағы положениене» хупланы.

Йоматау санаторийында Башҡортостан хеҙмәтсәндәре һәр й... ды дауаланып, ял итеп, сынығып ҡайталар.

Һүрәттә: Быйылғы сезонда ял итеүсе нефть эшселәре...

А. Калашников һәм А. Ириков фото...

Редакция почтаһынан

«Ҡыҙыл Башҡортостан» газетаһы редакцияһына бөгөнгә почта менән урындарҙағы хәбәрселәребеҙҙән һәм үҙ хәбәрселәребеҙҙән килгән хаттарҙың күпселек өлөшө ауыл хужалығы мәсьәләләренә, сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенең барышын, бесән сабыуға һәм урожай йыйнауға әҙерлектең торошон яктыртыуға арналған.

«Салауат районында комбайндар менән урожай йыйнарға уйламайҙар микән ни? — тип яҙа газетабыҙҙың актив хәбәрсеһе З. Вәлиев. — Ошо ваҡытҡа тиклем районың ике МТС-ындағы 45 комбайндың бары тик 15-е генә ремонттан сыҡҡан». Шаран МТС-ынан алынған хәбәрҙә лә шулай уҡ етешһеҙлектәр күрһәтелгән: мастерскойҙа хеҙмәт дисциплинаһы йомшаҡ булғанға күрә, бында ремонтланырға тейешле 17 комбайндың ни бары 4-е генә сафҡа индерелгән.

Маҡар районының Сталин исемендәге колхозында ашлыҡтарҙы тәрбиәләү эшенең насар ойошторолоуы тураһында хәбәрсебеҙ С. Сәйфи, Йомағужа районының «Равенство» колхозында бесән сабыуға әҙерлектең торошо тураһында Ф. Ғималетдинов яҙа. Түймазы, Шишмә, Дәүләкән һәм б... ка райондарҙа урожай йый... әҙерлек тураһында ла бер ... хат килде.

Ғафури районының Ерек а... аркыры һуҙылған оло юлын... ка ярлы йылғала күпер һ... мауы һәм шуның арҡаһында ... мәтле йөк тейәгән автом... ларҙың бында 4—5-әр сәғәт ... талып тороуҙары тураһында ... хәбәрсе иптәш Т. Хәмзин, ... Советтәге бөтә колхозсылар... да юлдарҙы төҙөкләндереү эш... ҡатнашырға тейешлектәрен ... һәтә.

ВКП(б)-ның Башҡортостан ө... конференцияһы ҡарарҙарын ... юлында үҙҙәренсә нәмәләр ... үен күрһәтеп, партияның Т... райкомының агитация һәм пропаганда бүлеге мөдире М. Сә... динов махсус хат яҙып ебәр...

Әлшәй районының «Пр... һәм Сталин исемендәге колхо... рында һабан туй үҙғарылыуы, ... тантанала һәр ике колхозға ... күрше ауылдарҙан килеүселәр... иҫәпләгәндә, 150...-1800-әр кеше ҡатнашҡанлығы ... раһында хәбәр алынды.

Кисә редакцияға бөтәһе 21 ... һәм хәбәр килде.

Концерт менән колхоздарға

Өфө ҡалаһы, 7-се номерле балалар йортоноң үҙешмәкәр түңәрәге уҡыу йылы барышында кинотеатрҙарҙа, балалар йорттарында, мәктәптәрҙә һәм башҡа күп кенә урындарҙа бик матур сығыштар яһаны.

Йәйге эш планы буйынса түңәрәк концерт номерҙәре менән колхоздарға сығырға тейеш ине. Уҡыу йылы тамамланыу менән уҡ, ул планды үтәүгә керешә.

Балалар йортоноң уҡыу бүлеге мөдире Ғ. Хәсәнова һәм уҡытыусы Ф. Ибраһимова етәкселегендә түңәрәк члендәре Ҡырмыҫҡалы һәм Биштәкә ауылдарына (Ҡырмыҫҡалы районы) концерт ҡуй... ға барҙылар. Колхозсылар ... ҙы яратып ҡаршы алды. ... колхоздың да клубтары ... тыш тулы булды. Колхоз... С. Сафарғәлиева, Ф. Байков... Ғәлиев, Р. Иосопов, Р. Р... лов, З. Сәлимгәрәева, Ф. Ду... ларҙың оҫта бейеүҙәрен, ... М. Муллағоловтың гармонда ... уйын айырыуса һөйөп ... лар, ҡабат-ҡабат сәхнәгә сы... ҙылар. Оҙатҡанда тағы ла ки... ҙәрен һоранылар.

Оҙаҡламай түңәрәк тағы колхоздарға китә.

Ф. Иҫәнғол...

Зоология күргәҙмәһе асыла

Өфөгә, Молотов ҡалаһынан күсмә зоология күргәҙмәһе килде. Ул Өфөлә бер ай ярым ваҡыт буласаҡ. Күргәҙмәлә төрлө ҡырағай ҡоштар, йыртҡыс йәнлектәр: тигр, инә арыҫлан, гиена, айыу, бүре, төлкө, бурһыҡ, һыуһар, дикообраз, маймыл, страус, ялан бөркөтө, попугай, аист, аҡҡош, бохар боланы, рысь һәм башҡалар күрһәтеләсәк.

Был күргәҙмә Башҡортостандың ҡайһы бер райондарына барасаҡ. Йәнлектәрҙе ҡарау ваҡытында, күргәҙмәнең директоры иптәш Бершадский «ауыл хужалығына зарарлы һәм файҙалы ҡоштар һәм йәнлектәр» тигән темаға лекция һөйләйәсәк.

Яуаплы редактор: Ғ. В. ГУЗАИРОВ

Колхозсылар һәм колхозсы ҡатын-ҡыҙҙар

Йорт хозяйкалары, уҡыусылар һәм пионерҙәр!

Иптәштәр! Дарыу үләндәре халыҡты дауалауҙың берҙән-бер яҡшы средствоһы булып тора.

Башҡортостанда дарыу үләндәре йыйнауҙың мөмкинлектәре ҙур. Майлән, утнуҙ, гөльемеш, валериан тамыры; арыш инәһе, аҡһырғаҡ, эт муйылы ҡабығы, балан, тилебәрән япрағы, уймаҡ сәскә һәм башҡа үләндәр бик күп.

Дарыу үләндәрен йыйып, аптекаларға тапшырыу менән беҙ хөкүмәткә медикаменттар запасын булдырыуҙа һәм эшсән халыҡтарға сәләмәтлеген ныҡытыуҙа ҙур ярҙам күрһәтәбеҙ.

Дарыу үләндәрен йыйыу—сезонлы эш, шуның өсөн уларҙы йыйыу ваҡытын үткәрмәҫкә, һәр культураны үҙ ваҡытында йыйырға тырышырға кәрәк.

Йыйылған дарыу үләндәрен үҙегеҙгә яҡын булған аптекаға тапшырығыҙ.

Унда һеҙгә дарыу үләндәрен нисек йыйырға, нисек киптерергә күрһәтмәләр бирерҙәр. Дарыу үләндәре ...

Башаптекоуправление

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00192 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл № 126 26 июнь шәмбе

Хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Германия тураһындағы Лондон кәңәшмәһе ҡарарҙары айҡанлы СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙәренең 24 июнда ҡабул ителгән белдереүҙәре. (1—2-се биттәр).

З. Бикшева.—Орденле оператор. (2-се бит).

М. Хәйҙаров. —Ҡышҡа әҙерлекте көсәйтергә. (2-се бит).

Өлкә партия ойошмаһында пропаганда һәм агитация эшенең торошо һәм уны көсәйтеү саралары тураһында ВКП(б) Өлкә Комитеты пленумында ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда буйынса секретаре иптәш Г. Ф. Шафиҡовтың һөйләгән докланы. (3-сө бит).

Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы. Маршал Соколовскийҙың приказы. (4-се бит).

НЕФТТЕ РАЗВЕДКАЛАУ ЭШТӘРЕН БӨТӘ ЯҠЛАП АЛҒА ЕБӘРЕРГӘ

Данлы Ленин ҡалаһының алдынғы предприятиеларе коллективтәре саҡырыуы буйынса илебеҙҙә социалистик ярыш тулҡыны йәйелде. Был маҡтаулы хәрәкәттә Башҡортостан нефтселәренең тауышы ла ғорур яңғырай. Улар үҙгән йылда нефть сығарыу һәм нефть эшкәртеү буйынса заданиеләрҙе арттырып үтәнеләр. «Туймазынефть» тресы һәм Өфө нефть эшкәртеү заводы хөкүмәттең юғары наградаһын яулап алдылар — Ленин ордене менән награҙландылар. Республикабыҙҙың нефтселәре ағымдағы 1948 йылда — сталинсе яңы биш йыллыҡтың хәл иткес өсөнсө йылында яңы, юғары йөкләмәләр алып, иптәш Сталинға хат менән мөрәжәғәт иттеләр.

Бөйөк юлбашсыға биргән вәғәҙәне үтәү өсөн нефть промышленносендә бөтә тармаҡтарҙың, бигерәк тә разведка тармағының, әлгәлә һәм аныҡ эшләүе кәрәк. Быйыл нефтте разведкалау эштәре, үҙған йылға сағыштырғанда, 65 процентҡа күберәк итеп планлаштырылды. Ағымдағы йылда Баулы структураһы нефть сығарыуға әҙерләнә. Ардатовка, Михайловка структураһында промышленный нефть разведкалана. Сәлих, Кинйәбулат, Красноусол структураларында тәрән ҡатламдарҙа нефть эҙләү буйынса ҙур эштәр үткәрелә. Былардан башҡа тағы тиҫталаған яңы структуралар разведкалауға билдәләнгән.

Былар, нефтте разведкалау эшенә ни тиклем әһәмиәт бирелеүен асыҡ күрһәтә һәм нефтселәрҙән разведкалауға ныҡлы хеҙмәт һалыуҙарын талап итә.

Шулай булыуға ҡарамаҫтан, разведкалау эштәре республикабыҙҙың нефть промышленносендә әле артта ҡалыуын дауам итә. Разведкалаусылар үҙгән йылда планды 20 процентҡа үтәп еткермәнеләр. Ардатовка, Кинйәбулат, Ҡарлы һәм Красноусол майҙандарындағы нефть горизонттарын билдәләү бөгөнгә тиклем хәл ителмәгән.

Ағымдағы йылдың икенсе кварталы башында ВКП(б) Өлкә Комитеты «Башнефтеразведка» тресы эшендәге сериеҙ етешһеҙлектәрҙе күрһәтеп, уларҙы бөтөрөү маҡсатында конкрет саралар билдәләгәйне. Ләкин трест етәкселәре лә һәм «Башнефть» берекмәһе етәкселәре лә үҙҙәренә тейешле һығымта яһамаҡылар. Ағымдағы йылдың тәүге биш айлыҡ разведкалау планы «Башнефть» берекмәһе буйынса ни бары 88 процентҡа үтәлде. Июль айында ла темп ҡәнәғәтләнерлек түгел.

Дөрөҫ, был урында «Туймазынефть» тресына ҡарата айырым иҫкәрмә яһарға кәрәк. Унда мөмкинлектәр, тулыһынса файҙаланыла. «Туймазынефть» тресы разведкалау буйынса заданиеләрҙе айҙан-айға арттырып үтәй. Июнь айының тәүге ике декадаһында иһә задание үтәлеше 115 процент тәшкил итте.

Берекмәнең башҡа трестары ла туймазылылар кеүек яҡшы эшләй алалар. Ләкин управляющийҙәре Коваленко һәм Сидоренко булған «Ишембайнефть» һәм «Башнефтеразведка» трестарында был хәлдең киреһе. Улар заданиеләрҙе үтәмәйҙәр һәм шуның һөҙөмтәһендә бөтә берекмәнең артҡа ҡалыуына сәбәпсе булып торалар. Был трестарҙа авариялар күп. Төҙөү материалдары һәм оборудованиелар ваҡытында разведка майҙандарына килтерелмәй. Ҡарғалы майҙанында разведкалана башлаған скважина авария арҡаһында ярты йылдан артыҡ инде эшләмәй тора. Бөтә «Башнефть» берекмәһендә разведкалау эшендә простойҙар дөйөм эш ваҡытының 13—14 процентен алып торалар.

Трест етәкселәре эште аныҡ ойоштормайҙар, разведкалау эштәрен алдан ентекләп эшләнгән план нигеҙендә алып бармайҙар, был хәлдәрҙән, һис шикһеҙ, ҡотола алалар. Тап бына ошо сифат «Ишембайнефть» һәм «Башнефтеразведка» трестарының етәкселәрендә етешмәй.

Һыналған турбин юлы менән бораулау методына ла трестарҙа тейешле әһәмиәт бирелмәй. Был өлкәлә туймазылыларҙың гүзәл эш өлгөләре бар. Унда алдынғы бораулау мастерҙәре Куприянов һәм Кнутов иптәштәр турбин менән бораулап, станок-айға 800—900 метр күләмендә проходка бирәләр.

«Башнефть» берекмәһе етәкселәре, [illegible] алдынғы эш методтарын бөтә участкаларҙың, бөтә эшселәрҙең достояниеһе итеү өсөн эшлекле саралар күрергә бурыслылар. Айырым әйткәндә, турбин юлы менән бораулауҙы бөтә трестарҙа ла киң рәүештә ҡулланырға кәрәк.

Сталинсе яңы биш йыллыҡта нефть сығарыуҙы үҫтереү буйынса билдәләнгән ҙур эш программалары нефтте разведкалау эштәрен бөтә яҡлап алға ебәреүҙе, үҫтереүҙе һәм киңәйтеүҙе талап итә. Разведкала эшләүсе һәр бер эшсе, мастер, оператор заданиеләрҙе үтәү өсөн максимум көс һалып эшләргә бурыслы, ә трест етәкселәре, ундағы партия, профсоюз ойошмалары эшселәр массаһының хеҙмәт активлеге башында торол етәкселек итергә, разведкалау эштәрен яңы биш йыллыҡ талап иткән кимәлгә яуап бирерлек итеп ойошторорға тейештәр.

Һигеҙ государствоның Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшавалағы кәңәшмәһе эшенең тамамланыуы

24 июнда СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙәренең кәңәшмәһе үҙ эшен тамамланы.

Иртәнге ултырышта СССР Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов, ә кискә ултырышта — Румыния Сит ил Эштәре Министры А. Паукер председателлек итте.

Кәңәшмә Германия мәсьәләһе буйынса Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙарына ҡарата белдереү тексы әҙерләне. Белдереү тексы айырым рәүештә иғлан ителә.

В. М. Молотов Варшава ҡалаһын ҡараны

ВАРШАВА, 24 июнь. (ТАСС). Бөгөн СССР-ҙың Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов Варшава ҡалаһын ҡараны һәм Варшава ҡалаһына алып бара торған юлдарҙы реконструкциялауҙы индергән ҙур «Көнсығыш—көнбайыш» магистрале төҙөлөшөндә булды. Висла һыуы аша капиталь яңы күпер һалыуҙы, ҡала юлы өсөн туннель эшләүҙе, йәйәүлеләр өсөн эскалатор төҙөүҙе ҡараны. В. М. Молотов, шулай уҡ, ҡаланың байтаҡ районадарында булды. Мәҫәлән, эшселәр районы Жолибожды, иҫке ҡаланы һәм геттоны, гестапо ҡулынан һәләк булыусыларға ҡуйылған һәйкәлде ҡараны. Варшава ҡалаһында йөрөгәндә В. М. Молотов менән бергә Варшава ҡалаһының президенте Толбинский әфәнде, төҙөкләндереү министре Кочаровский әфәнде, Сит ил Эштәре Министрлығының матбуғат департаменте директоры Грош әфәнде һәм шулай уҡ, СССР-ҙың Польшалағы послы В. З. Лебедев булды.

СССР Министрҙәр Советы Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотовтың Польша республикаһының президенте Болеслав Берутта булыуы

ВАРШАВА, 24 июнь. (ТАСС). Бөгөн СССР Министрҙәр Советы Председателенең урынбаҫары һәм Сит ил Эштәре Министры В. М. Молотов Польша республикаһының президенте Б. Берут әфәндел булды. Молотов иптәште СССР-ҙың Польшалағы послы В. З. Лебедев оҙатып барҙы.

Германия тураһындағы Лондон кәңәшмәһе ҡарарҙары айҡанлы СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙәренең 24 июнда ҡабул ителгән белдереүҙәре

Өс державаның — АҠШ, Великобритания һәм Францияның Германия мәсьәләһе буйынса Лондонда үткәрелгән кәңәшмәһенең тамамланыуы тураһында 7 июнда коммюнике иғлан ителгәйне. Коммюникелә юғарыла күрһәтелгән йәшерен кәңәшмәлә Германия тураһында төп политик һәм экономик мәсьәләләр буйынса һәм шулай уҡ Германияның көнбайыш сиктәрен үҙгәртеү тураһындағы мәсьәлә буйынса ҡабул ителгән ҡарарҙарҙың йөкмәткеһе күрһәтелгән, шулай ҙа матбуғатта сыҡҡан хәбәрҙәр, кәңәшмәлә ҡабул ителгән ҡайһы бер ҡарарҙар тураһында коммюникелә әйтелмәгәнлеген күрһәтәләр.

Лондон кәңәшмәһе Потсдам килешеүен боҙоп саҡырылды, ул килешеү буйынса, Германияға ҡағыла торған мәсьәләләр дүрт держава — СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция тарафынан хәл ителергә тейеш; шуның менән бергә, был мәсьәләләрҙе тикшереү ошо державаларҙың вәкилдәренән торған Сит ил Эштәре Министрҙәре Советенә йөкмәтелгәйне. Шулай уҡ бындай фактыны күрмәй үтеү мөмкин түгел, — өс державаның был сепаратный кәңәшмәһендә ҡатнашыу өсөн, шулай уҡ, Бенилюкс илдәре лә (Бельгия, Нидерландия, Люксембург) саҡырылдылар; шул уҡ ваҡытта, унда Польша, Чехословакия кеүек Германия менән сиктәш государстволар һәм тура-тура был мәсьәлә менән ҡыҙыҡһыныусы башҡа илдәр ҙә ҡатнашманылар.

Германия мәсьәләһе буйынса Лондонда сепаратный кәңәшмә саҡырыу был кәңәшмәне ойоштороусы АҠШ, Великобритания һәм Франция [illegible] Потсдам конференцияһында төҙөлгән Сит ил Эштәре Министрҙәре Советен бөтөрөүҙе һәм шулай уҡ уның әлегерәк дүрт держава араһында төҙөлгән килешеү буйынса Германияла ойошторолған дүрт яҡлы контроль механизмде бөтөрөүҙе үҙҙәренең маҡсаты итеп ҡуйғанлыҡтарын күрһәтә. АҠШ, СССР, Великобритания һәм Франция араһында Германия мәсьәләһе буйынса төҙөлгән әлекке килешеүҙәрҙе был рәүешле боҙоу һәм шулай уҡ ҡыҙыҡһынған илдәр менән консультациялар үткәреү тураһындағы йөкләмәләрҙе боҙоу бөтә кешенең күҙ алдында алып барыла һәм киләсәктә Германия агрессияһының ҡабатланыуына юл ҡуймауға йүнәлтелгән, Германияны демилитаризациялау һәм демократизациялау тураһындағы Потсдам килешеүен өҙөүгә алып бара.

Германия тураһында йәшәп килгән килешеүҙәрҙе был рәүешле боҙоу Германияны оккупациялаған дүрт державаның һәм Германия агрессияһына дусар булған государстволарҙың тормош интерестарына ғына түгел, бәлки Европала ныҡлы һәм оҙаҡ тыныслыҡ урынлаштырыуға ынтылыусы бөтә Европа илдәренең дә интерестарына ҡағыла.

Билдәле булғанынса, Ялта һәм Потсдам килешеүҙәре Германияны ҡоралһыҙландырыу һәм уның хәрби промышленносен бөтөрөүҙе, Германия милитаризмының нигеҙен емереүҙе һәм Германияның агрессив держава булып аяҡҡа баҫтырылыуына юл ҡуймауҙы, һәм шулай итеп, Германияны тыныслыҡ һөйөүсе һәм демократик илгә әүерелдереүҙе маҡсат итеп алалар. Шуның менән бергә, Ялта һәм Потсдам килешеүҙәре Германиянан репарациялар түләтеүҙе һәм шуның менән, Германия агрессияһынан яфа күргән илдәрҙең зарарҙарының исмаһам бер өлөшөн генә булһа ла ҡаплауҙы күҙҙә тоталар.

Өс державаның Бенилюкс ҡатнашлығында, Лондонда үткәрелгән кәңәшмәһенең ҡарарҙары башҡа маҡсаттарҙы күҙҙә тота. Был ҡарарҙар Германияны демилитаризациялау һәм демократизациялау бурыстарын, Германияны тыныслыҡ һөйөүсе демократик государствоға әйләндереү бурыстарын ситкә алып ырғыта, һәм Германияның репарацион йөкләмәләре тураһында бөтөнләй бер һүҙ ҙә әйтмәй. Лондон ҡарарҙары Германияның яңы агрессияһын булдырмауға түгел, ә Германияның көнбайыш өлөшөн, һәм, бөтәһенән элек, Рурҙағы ауыр промышленносте Германияның хәрби потенциалын аяҡҡа баҫтырыу ҡоралына әүерелдереүгә уны Америка Ҡушма Штаттарының һәм Англияның хәрби-стратегик маҡсаттарына файҙаланыуға йүнәлтелгән. Бындай пландың немец агрессияһының ҡабатланыуы өсөн яҡшы шарттар тыуҙырмауы мөмкин түгел.

Шуның менән бергә, Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙары, һуңғы ваҡыттарҙа Америка Ҡушма Штаттары ҡанаты аҫтында Великобритания, Франция, Бельгия, Нидерландия һәм Люксембург хөкүмәттәре тарафынан төҙөлгән «Көнбайыш хәрби союзының» ысын мәғәнәһе нәмәлә булыуын күрһәтә. Шулай уҡ Америка Ҡушма Штаттары ла ҡатнашлыҡ иткән Лондон кәңәшмәһе, юғарыла күрһәтелгән биш государствоны эсенә алған «Көнбайыш хәрби союзына» ҡарағанда ла тағы ла асығыраҡ рәүештә үҙ алдына Германияның яңы агрессияһын булдырмау өсөн алдан иҫкәртеү бурысын түгел, ә бөтөнләй башҡа мәсьәләләрҙе ҡуйҙы. АҠШ һәм Великобританияның хәрби-стратегик пландарына бөтә Германияны тартып индереүҙең мөмкин булмауын белеп, Лондон кәңәшмәһе Германияның көнбайыш зоналарын был пландарҙың базалары итергә, был зоналарҙы Германияның башҡа өлөштәренән айырырға тырыша.

1. Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙары Германияны бүлеүҙе һәм ваҡлауҙы тегәлләүгә йүнәлтелгәндәр. Лондон кәңәшмәһе Германияның политик һәм экономик берҙәмлеге [illegible] АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре белдергәнсә, һүҙҙә генә булһа ла иҡрар итеүҙән баш тартып, юғарыла күрһәтелгән державаларҙың сепаратный эштәре менән Германияның башҡа өлөшөнән айырылған көнбайыш өлөшө өсөн хөкүмәт төҙөүҙе әҙерләне. Бының өсөн Англия, Америка һәм Франция оккупациялаған зоналарҙың вәкилдәренән махсус һайлап алынған учредительный собрание саҡырыу күҙҙә тотолған. Был, Германияның көнбайыш өлөшө өсөн көнбайыш зоналарҙағы оккупацион властарға яраҡлы һәм Америка, Англия капиталистик монополиялары менән тығыҙ рәүештә бәйләнгән, ләкин герман халҡы менән бәйләнештә булмаған һәм уның демократик ынтылыштарына дошман булған ошондай герман элементтәренән марионет хөкүмәт төҙөүҙе тәьмин итергә тейеш. Был АҠШ менән Великобритания һәм Франция араһында Германияны политик һәм экономик яҡтан айырыу һәм бүлгеләү тураһында һәм көнбайыш зоналарҙа герман халҡының Германияның берҙәмлеге һәм уны демократизациялау тураһындағы законлы талаптарына ҡаршы торорға тейешле ошондай сепаратный хөкүмәт төҙөү тураһында үҙ-ара килешеү яһалған, тигән һүҙ.

Германияны политик яҡтан айырыу һәм бүлгеләү буйынса юғарыла күрһәтелгән саралардан тыш, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре хәҙер Германияны экономик яҡтан айырыу һәм бүлгеләү буйынса ла яңы саралар үткәрәләр. Лондон кәңәшмәһе тамамланғандан һуң, шунда уҡ АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре Германияның көнбайыш зоналары өсөн 18 июнда иғлан ителгән аҡса реформаһы үткәрә башланылар, ә юғарыла әйтелгән коммюнике был мәсьәлә буйынса Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙары тураһында бер һүҙ ҙә өндәшмәгәйне. Совет Хөкүмәте тәҡдим иткәнсә, СССР, АҠШ, Великобритания һәм Франция араһында килешеү буйынса бөтә Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреүҙең күҙгә күренеп торған кәрәклегенә ҡапма-ҡаршы рәүештә Германияның көнбайыш зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәрелде.

Үҙ ваҡытында дүрт держава араһындағы килешеү буйынса билдәләнгәнсә, бында яһалған килгән бөтә Германия өсөн бер төрлө маркалы берҙәм аҡса системаһы урынына, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре сепаратный юл менән аҡса реформаһы үткәрҙеләр һәм Германияның көнбайыш өлөшө өсөн айырым марка билдәләнеләр. Был, экономик яҡтарҙан Германияның көнбайыш өлөшө менән уның ҡалған өлөшө араһына стена ҡуя һәм Германияның экономик яҡтан бүлгәнләгән бөтөрөү һәм уның халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу өсөн бик күп яңы ҡыйынлыҡтар тыуҙыра. Германияның көнбайыш зоналарында бөтә аҡса реформаһы эре хосуси милексәләр өсөн һәм, бөтәһенән элек, Америка һәм Британия капиталистик монополиялары менән тығыҙ бәйләнештә булған герман монополиялары өсөн файҙа тәьмин итеү иҫәбе менән үткәрелә, был Көнбайыш Германияла эшһеҙлек артыу һәм хеҙмәтсәндәрҙең материаль хәлдәре насарайыу ҡурҡынысын тыуҙыра һәм башҡа илдәр менән экономик мөнәсәбәттәрҙә яңы ҡыйынлыҡтарға алып бара.

Лондон кәңәшмәһенең ҡотолғоһоҙ эҙемталәре бына ошондай, уның ҡарарҙары Германияны политик һәм экономик яҡтан бүлеү һәм ваҡлауҙы тегәлләүгә алып бара.

2. Германияны политик яҡтан бүлеү һәм ваҡлау Германия менән ярашыу договорын төҙөүҙе өҙә, уны төҙөмәйенсә һуғыш хәлендә тороуҙың һүҙылыуын һәм Европала оккупацион режимде бөтөрөү мөмкин түгел. Лондон кәңәшмәһе тураһында коммюникелә Германия менән ярашыу договоры тураһында бер генә һүҙ ҙә әйтелмәүе һәм ярашыу договоры әҙерләү тураһындағы мәсьәләгә ҡаҡа ҡағылмауы ла осраҡлы хәл түгел.

АҠШ, Великобритания һәм Францияның Бенилюкс ҡатнашлығындағы Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙары, был державалар хөкүмәттәренең һәм уларға яҡын торған герман круғтарының Германия менән ярашыу договорын тиҙерәк төҙөү һәм оккупацион ғәскәрҙәрҙе Германиянан тиҙерәк сығарыу менән ҡыҙыҡһынмауҙарын раҫлай.

Германиялағы бөтә мәсьәләне тыныс юл менән хәл итеү урынына АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре Германияның көнбайыш зоналарында оккупацион статут тип аталған нәмәне индерергә әҙерләнәләр, Лондон коммюникеһе юрамал томаналы һүҙҙәр менән шуға ишара итә. Тыныслыҡ һөйөүсе бөтә халыҡтарҙың интерестәре Германия менән ярашыу договорын тиҙерәк төҙөүҙе талап иткән бер ваҡытта, ә был, Германия өҫтөнән оккупацион режимде алып ташларға һәм герман халҡын тулыһы менән тыныс һәм демократик үҫеш шарттарына ҡайтарырға тейеш, АҠШ, Великобритания һәм Франция хөкүмәттәре Германия менән ярашыу договорын тиҙ төҙөүгә юл ҡуйырға теләмәйҙәр һәм Германияны оккупациялауҙы аңлы рәүештә оҙаҡҡа һуҙыр өсөн, оҙаҡ йылдарға немец халҡы өҫтөнә оккупацион расходтар ауырлығын һалып, Германияның көнбайыш зоналарына үҙҙәренең «оккупацион статутын» көсләп тағырға тырышалар. Америка, Британия һәм Францияның герман халҡын ҡол итеүгә һәм Европала эште тыныс юл менән хәл итеүҙе оҙаҡҡа һуҙыуға алып барыусы бындай политика Германияны тыныслыҡ һөйөүсе һәм демократик государство итеп ҡайтанан төҙөү менән бер урынға һыйыша алмай, шулай уҡ Европала демократик тыныслыҡты тиҙ арала урынлаштырыуға халыҡтарҙың ынтылышы менән дә бер урынға һыйыша алмай.

3. Германияның көнбайыш зоналарында государство ҡоролошо тураһында Лондон кәңәшмәһе тарафынан ҡабул ителгән ҡарар демократияға ҡаршы рух менән һуғарылған. Учредительный собрание тип аталған нәмәне саҡырыуға һәм Германия конституцияһын төҙөүгә бөтә әҙерлек эше өс хәрби губернаторға һәм Германияның көнбайыш оккупацион зоналарҙағы ер премьер-министрҙәре ҡулына тапшырылған. Герман халҡының интерестәрен яҡлаусы демократик партиялар, профессиональ союздар һәм башҡа демократик ойошмалар был эштән бөтөнләй ситләтелгәндәр.

Европа халыҡтарының тыныслыҡ һәм имиселек интерестәре Германияла ландтагтарҙың һәм ерҙәрҙең автономиялы управлениеһен бөтөргән Германияның государство управлениеһенең гитлерсә үҙәкләштерелеүен бөтөрөүҙе һәм ландтагтарҙы һәм ике дөйөм герман палатаһын булдырып, Гитлер режимына тиклем, йәшәгән үҙәкләштерелмәгән идара итеүҙе аяҡҡа баҫтырыуҙы талап итәләр. Был, демократик ойошмаларға иркле эшмәкәрлеккә мөмкинлек бирелгән шартта, Германияның берҙәмлеген һәм Германия государствоһын тыныс һәм демократик тәртиптә ҡайтанан төҙөүҙе тәьмин итер.

Лондон кәңәшмәһенең ҡарарҙары бөтөнләй башҡа йүнәлештә баралар.

Лондон кәңәшмәһе үҙәкләштерелгән рейхты булдырмау һылтауы аҫтында Германияны артҡа ташларға һәм герман халҡына федераль государство төҙөлөшөн тағырға маташа. Бындай государство төҙөлөшөндә төп власть айырым ерҙәргә бирелә, ә дөйөм государство управлениеһе иҡе дәрәжәләге функциялар ме[illegible] сикләнә. Хәҙерге заман демократик государстволарҙың үҫ[illegible] ҡапма-ҡаршы килеүгә ҡа[illegible] тан, был шулай эшләнә.

Англия-Франция-Америк[illegible] был планы. Германия[illegible] ҙе маҡсат итеп ҡуя, [illegible] ман государствоһын [illegible] алып бара. Германияны [illegible] зацияға (бүлгеләүгә) алып[illegible] сы был планды тормошҡ[illegible] рыу, Германияның берҙәмл[illegible] һын, Германияны мили[illegible] һәм башҡа халыҡтар өҫт[illegible] кимлек итеүсе ил булыу [illegible] аяҡҡа баҫтырырға ынтылыу[illegible] мең шовинистәре һәм реванш[illegible] ре ҡулына бирә. Шуның һөҙөмтәһендә реванш идеяһы башын күтәрер, шовинизм көсәйер, ә бының өсөн Германияла яҡшы өлөштәр бар һәм яңы бисмарктар йәки хатта, яңы гитлерҙәр килеп сығыуға шарттар тыуҙырылыр. Әгәр Германия халҡының берҙәм Германия өсөн ынтылышы Германияның көнбайыш зоналарында оккупацион властәр тарафынан инде күп хуплауҙар алған герман шовинистәре һәм милитаристәре ҡулында яңынан ҡорал булһа, ул ваҡыт был Европа халыҡтары өсөн, һәм, шул иҫәптән, герман халыҡтары өсөн иң ауыр эҙемтәле немец агрессияһының ҡотолғоһоҙ ҡабатланыуына килтерер. Был, тыныслыҡ һөйөүсе халыҡтарҙы яңы һуғыш тоҡандырыусыларға ҡаршы көрәш сараларын көсәйтергә мәжбүр итә.

4. Германияның көнбайыш зоналарын оккупациялаусы державаларҙың үткәргән политикаһы кемеҫтәрҙең реваншист элементтарен дәртләндерә. Улар, Германияны демократизациялау һәм демилитаризациялау, Германия агрессияһы һөҙөмтәһендә яһалған зыянды түләү буйынса уның йөкләмәләре тураһындағы мәсьәләгә ҡарата Ялта һәм Потсдам конференцияларындағы килешеүҙәргә ҡаршы һәм немец кешеләрен күсереү тураһындағы билдәле ҡарарға ҡаршы, был кешеләрҙе күрше государстволарға дошманлыҡ маҡсаттарында файҙаланырға тырышып, кампания алып баралар.

Немец реваншист элементтәренең кампанияһы бигерәк тә тейешмәҫ еҙ — тыныслыҡ сиге булған Одерҙағы һәм Көнбайыш Нейселәге польша-немец сиктәрен [illegible] йүнәлтелгән.

Лондон [illegible] реваншистик [illegible] мәсьәлә [illegible] һәм, шулай уҡ [illegible] немец шовинист круғта[illegible] агрессив тенденц[illegible] дәртләндерә. Был хәлд[illegible] шовинистик хәрәкәтт[illegible] саралар күре[illegible] Европ[illegible] бергә. [illegible] рының тыныслығын һә[illegible] ген [illegible] мерле [illegible] зың [illegible] мерле [illegible] мәйес.

[illegible] Маклецов фотоһы.
[illegible] фотохроникаһы).

Германия тураһындағы Лондон кәңәшмәһә ҡарарҙары айҡанлы СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙарының 24 июндә ҡабул ителгән белдереүҙәре

(Аҙағы. Башы 1-се биттә).

5. Өс державаның Лондондағы кәңәшмәһенең ҡарарҙары Көнбайыш Германияның экономикаһын Америка Ҡушма Штаттары һәм Англия маҡсаттарына буйһондоралар, уны «Маршалл планын» Европала үткәреүҙән бойондороҡло итеп ҡуялар. Был, Көнбайыш Германияның промышленносе һәм экономикаһының башҡа тармаҡтары Америка һәм шулай уҡ Англия капиталистәре монополияларының пландары менән бәйләнә тигән һүҙ. Улар Германияның көнбайыш зоналарындағы бөтә экономик тормошто үҙҙәренә буйһондорорға ынтылалар һәм Германияның тыныс промышленносын ысын мәғәнәһендә аяҡҡа баҫтырыу һәм күтәреү менән һис ҡыҙыҡһынмайҙар; улар Германия экономикаһын үҙҙәренең конкуренттары тип ҡарайҙар.

Был экспансия политикаһы «Маршалл планы» менән бәйләнгән илдәрҙең Америка һәм Англия монополияларынан бойондороҡлолоҡтарын артабан көсәйтеү маҡсаттарын күҙҙә тота.

Германияның тыныс промышленносын аяҡҡа баҫтырыу башҡа халыҡтарҙың интерестарына ҡаршы килмәй генә түгел, бәлки Европаны экономик яҡтан аяҡҡа баҫтырыу бурыстарына яраҡлы. Герман халҡына тыныс промышленносте, ауыл хужалығын һәм транспортты, шулай уҡ тышҡы сауҙаны аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү эшендә киң мөмкинлектәр бирелергә тейеш, сөнки Германия быныһыҙ башҡа йәшәй алмаясаҡ һәм герман агрессияһынан зыян күргән илдәргә үҙенең репарацион [illegible] үтәй алмаясаҡ. Шуның менән бергә, Германияның хәрби промышленносын [illegible] һәм герман милитаризмын [illegible] аяҡҡа баҫтырыуҙы булдырмаҫ [illegible], билдәле осорға дүрт державаның контроле һаҡланырға тейеш. Германияның көнбайыш зоналары экономикаһын «Маршалл планына» индереү Германияны [illegible] «Маршалл [illegible]» ике лагерға: бер [illegible] «[illegible] планын» ҡабул [illegible] һөҙөмтәһендә [illegible] Ҡушма Штаттарына буй[illegible] Европа государстволарын [illegible] яҡтан, үҙҙәренең эске [illegible] сит илдәрҙең тығыла[illegible] булмаған Европа илдәре [illegible] СССР, халыҡ демократик республикалар индергән ике лагерға бүленеүҙе аңлата.

Шулай итеп, Лондон кәңәшмәһе Германияны [illegible] һәм ваҡлау планын үткәреүҙе тиҙләп кенә ҡалмай, бәлки ул, шуның менән бергә, «Маршалл планына» ярашлы рәүештә, Европа илдәрен бер-берһенә ҡапма-ҡаршы торосы ике лагерға бүлеүҙе артабан тәрәнәйтә. Бындай политиканы тормошҡа ашырыуҙың Европа халыҡтарының дөйөм интерестәре, Европа хужалығын аяҡҡа баҫтырыу менән бер ниндәй ҙә уртаҡлығы булмауы үҙенән-үҙе аңлашыла. Американың, Великобританияның һәм Францияның был политикаһын үткәреү Германияның көнбайыш зоналары экономикаһын, демократик Германияның интерестәре менән бер нисек тә иҫәпләшмәүсе сит ил капиталының түҙеп тормаҫлыҡ экономик-экспансионистик шарттарына бойһондора.

6. Лондон кәңәшмәһе Рур тураһында махсус ҡарар ҡабул итте. Рур күмерен, коксын һәм корросын бүлеүҙе контролләү буйынса Лондон кәңәшмәһендә ҡатнашыусы державаларҙың вәкилдәренән махсус орган төҙөргә ҡарар ителгән. Күмер, кокс һәм корос етештереү был органдың контроленә алына, шуның менән Рур промышленносында Америка һәм Британия финанс промышленниктәренең хакимлеген нығытыу тәьмин ителә.

Шулай итеп, Советтәр Союзы һәм был кәңәшмәлә ҡатнашыусылар Рурҙың күмер һәм металлургия трестарын һәм картелдәрен герман халҡына биреүҙе талап итһәләр ҙә, АҠШ һәм Великобритания хөкүмәттәре производство өҫтөнән контроль яһауҙа Франция һәм СССР-ҙы ҡатнаштырмайынса, герман демократик ойошмаларының ниндәй ҙә булһа таҫҡирҙәрен [illegible] тыш, Рур ауыр промышленносы фактик рәүештә үҙҙәренең [illegible] ҡалдыралар. Шуның [illegible] бер яҡтан Америка һәм [illegible] монополистәре менән [illegible] яҡтан, немецтәрҙең [illegible] күмер һәм корос ҡойоу [illegible] араһында килешеүгә [illegible] һәм ул [illegible] потенциалын

агрессияһы усағын булдырыу мөмкинлеген тыуҙыра.

Бындай политиканың тыныслыҡ интерестәре менән, герман халҡы һәм Европаның башҡа халыҡтары интерестәре менән ярашлы булмауын аңлауы ауыр түгел. Тик Рур ауыр промышленносын герман халҡы ҡулына биреү һәм Рур промышленносе продукцияһын етештереү һәм бүлеү өҫтөнән дүрт государствоның — СССР-ҙың, АҠШ-тың, Великобританияның һәм Францияның билдәле срокҡа контролен ҡуйыу Рур промышленносенең тыныслыҡ маҡсаттары өсөн үҫеүен һәм Европа халыҡтарының именлеге интерестәрендә Рур тураһындағы мәсьәләне хәл итергә мөмкинлек бирер ине.

7. Бөтә был әйтелгәндәрҙән, Германияның берҙәмлеге тураһындағы һәм Германияла демилитаризациялау, денацификациялау һәм демократизациялау үткәреү тураһындағы, Германияның хәрби потенциалын юҡ итеү тураһындағы һәм яңы немец агрессияһының ҡалҡыуына еңеллек бирерҙәй шарттарҙы бөтөрөү тураһындағы мәсьәләләр буйынса **Ялта һәм Потсдам килешеүҙәрен тупаҫ рәүештә боҙоу** булып тора икәнлеге күренә.

Шунлыҡтан Лондон коммюникеһендә — Лондон ҡарары Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса дүрт держава араһында артабан килешеүҙәргә өлгәшеүҙе еңеләйтергә тейештәр, тигән белдереүҙең нигеҙһеҙ булыуын танырға кәрәк. Бындай белдереүҙең нигеҙһеҙлеге хатта Лондон ҡарарының Ялта һәм Потсдам конференцияларында ҡабул ителгән ҡарарҙарға тулыһынса ҡапма-ҡаршы булыуынан да, Германия өсөн дүрт тарафтан контроль механизме урынлаштырыу тураһындағы килешеүҙе һәм дүрт держава ҡатнашлығында Сит ил Эштәре Министрҙәре Советында Германия мәсьәләләрен ҡарау тураһындағы килешеүҙе өҙөүҙәре лә күренә. Бенилюкс ҡатнашлығында өс державаның Лондондағы сепаратный кәңәшмәһе һәм ул державаларҙың сепаратный ҡарары Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса дүрт держава араһында килешеүҙәргә өлгәшеүҙе еңеләйтерә алмау ғына түгел, хатта АҠШ һәм Великобритания ҡатнашлығында булған халыҡ-ара килешеүҙәргә ҡарата халыҡтарҙың ышаныстарын өҙәләр. Ҡабул ителгән халыҡ-ара килешеүҙәрҙе боҙоу был килешеүҙәрҙе боҙоусыларға ҡарата ышаныс тыуҙыра алмай икәнлеген аңлауы ҡыйын түгел.

Юғарыла әйтелгәндәрҙән сығып, беҙ Лондон кәңәшмәһе ҡарарының законлы көсөн һәм ниндәй ҙә булһа мораль авторитетен таныуҙан баш тартабыҙ.

8. Германия тураһындағы мәсьәлә буйынса Ялта һәм Потсдам килешеүҙәренә ярашлы рәүештә СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия хөкүмәттәре, бөтәһенән дә элек, түбәндәге мәсьәләләрҙең хәл ителеүе кисектергеһеҙ, тип иҫәпләйҙәр.

Беренсе. Великобритания, СССР, Франция һәм АҠШ араһында килешеү буйынса, Германияны демилитаризациялауҙы тамамлауҙы тәьмин итеүсе саралар үткәреү.

Икенсе. Рур промышленносенең тыныс тармаҡтарын үҫтереү һәм Германияның хәрби потенциалының ҡаттанан аяҡҡа баҫыуына юл ҡуймау маҡсаттарында, Рур ауыр промышленносе өҫтөнән билдәле срокҡа дүрт державаның — Великобритания, СССР, Франция һәм АҠШ-тың контролен урынлаштырыу.

Өсөнсө. Великобритания, СССР, Франция һәм АҠШ хөкүмәттәре араһында килешеү менән герман агрессияһының ҡабаттан булмауына гарантия булдырыу маҡсатында Германияның демократик партиялары һәм ойошмалары вәкилдәренән торған тыныслыҡ һөйөүсе, демократик дөйөм Германияның ваҡытлы хөкүмәтен ойоштороу.

Дүртенсе. Потсдам ҡарарына ярашлы рәүештә Германия менән ярашыу договоры төҙөү, ярашыу договоры төҙөлгәндән һуң бер йыл ваҡыт эсендә бөтә державаларҙың оккупацион ғәскәрҙәре Германиянан сығарылып бөтөрөләргә тейештәр.

Бишенсе. Герман агрессияһынан зарарланған государстволар алдында Германияның репарацион йөкләмәләрен үтәү буйынса саралар эшләп сығарыу.

Редакция [illegible]

П00192

Әлшәй районының «Дим-Урал» колхозы бесән сабыу эшен башланы. Был колхоз алдындағы йылда бесән сабыу эшенә айырыуса әҙерлекле килде. Колхозсылар эштең беренсе көндәренән үк юғары хеҙмәт уңыштары күрһәттеләр.

Һүрәттә: «Дим-Урал» колхозсыларынан бер төркөм бесән сабыусы. В. Жданов фотоһы.

Эске пункттарҙы ремонтларға

Яңы урожайҙы ҡабул итеүгә тиклем эске пункттарҙағы иген складтарын бушатыу һәм ремонт яһау ҙур әһәмиәткә эйә. Ләкин Мәсетле районында тик Һабанаҡ һәм Мәсетле ауылдарындағы пункттар ғына игендән бушатылдылар. Кургат, Мөслим, Усть-Икин ауылларындағы эске пункттарҙан иген ташыу эшенең әле булһа башланғаны юҡ.

Район Советы башҡарма комитете һәм заготзерно бүлеге етәкселәре иген ташыу өсөн ат бүлеү тураһында колхоздарға ай һайын графиктәр биреү менән генә сикләнәләр. Ә графиктәр бер генә айҙа ла үтәлгәне юҡ. Май айы графиге лә өҙөлдө. Йөкле тартыу көстәре баҫыу эшенән бушанған булыуға ҡарамаҫтан, июнь айында ла игең сығарылмай. Район Советы исполкомы тарафынан планлаштырылған колхоз автомашиналарының береһе лә иген ташыуҙа ҡатнашмайҙар. Ә район колхозларында 16 автомашина бар. Шулай уҡ Союзтранстың Мәсәгүт автобазаһындағы 26 автомашинаның да тик 10—15-е генә иген ташыуҙа эшләй.

Иген ташыуҙа эшләүсе автомашиналар грузчиктәр менән тәьмин ителмәгәндәр. Аҡа пунктында иген тейәүҙә 20—25 грузчик эшләргә тейеш. Ләкин был ауыл Советы председателе иптәш Мортазиндең ғәйебе арҡаһында, бында тик 8—10 кеше генә эшләй. Һөҙөмтәлә, һәр бер машина 20 минут ваҡытта тейәлергә тейеш булһа, был эшкә бер сәғәт ваҡыт китә.

Райондағы бөтә складтарға ла һәм келәттәргә лә ремонт һәм дезинфекция талап ителә. Ләкин ул эштәрҙең береһе лә алып барылмай. Үҙган йыл дезинфекцияға иғтибар ителмәү һөҙөмтәһендә, айырым пункттарҙа игендәрҙең боҙолоу фактылары булды. Былар бөтәһе лә эске пункттарҙы йәһәтерәк бушатыуҙы һәм складтарҙы тулы әҙерлек хәленә килтереүҙе талап итәләр.

Н. Ғәлимов.

(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Анна Чуева звеноһында

Республикабыҙҙың маҡтаулы стахановсыһы, колхозсы, Россия Федерацияһы Верховный Советының депутаты Анна Чуева үҙенең тыуған колхозы «Золотой колос»та (Көнәргәҙе районы) звеновод булып эшләй.

Башҡортостан игенселәренең иптәш Сталинға яҙған хатында иптәш Чуева быйыл звено участкаһында һәр гектарҙа 30-ар центнер бөртөклө ашлыҡ үҫтерергә йөкләмә алғайны. Уның звеноһы был йөкләмәне үтәү өсөн тырышып эшләй.

Улар яҙғы сәсеүҙе яҡшы башҡарып сыҡтылар һәм хәҙер сәсеүлектәрҙе тәрбиәләйҙәр. 20 гектар ужым өҫтәмә аҙыҡландырылды һәм уталды. Һабан ашлыҡ культуралары хәҙер икенсе тапҡыр утауға башланы. Ашлыҡтар ҡуйы, таҙа булып үҫәләр. Арыш хәҙер кеше бейеклегенә тиңләде.

— Һис шикләнмәйенсә әйтә алам, — ти иптәш Чуева, — бөйөк юлбашсыбыҙға биргән вәғәҙәбеҙҙе тулыһынса үтәйәсәкбеҙ.

Утауҙа 180 кеше ҡатнаша

ЙӘРМӘКӘЙ. (Телефон аша). «Яңы тормош» колхозында һабан ашлыҡ сәсеүлектәрен ҡый үләндәренән таҙартыу эше яҡшы ойошторолған. Колхозда утауға көн һайын 180 кеше сыға. Рәбилә Ғәниева, Имам Насриев, Ғәлимә Әминева һәм башҡа иптәштәр етәкселек иткән звенолар айырыуса яҡшы эшләйҙәр. Көнбағыш утауҙа Хөснә Хужина көндәлек норманы 200 процентҡа үтәй. Күрше участкала эшләүсе Рәйсә Ғәлиуллина ла уңан ҡалышмай. Рәкиә Тәхфәтуллина 4 көн эсендә 2 гектар бойҙай утаны.

Колхозда 761 гектар бойҙай, 400 гектар һоло, 150 гектар арпа һәм башҡа культуралар — бөтәһе 1570 гектар сәсеүлек ҡый үләндәренән таҙартылды.

Уталған майҙандарҙа ашлыҡтар айырыуса яҡшы. Бойҙайҙың бейеклеге хәҙер 35—38 сантиметрға етте.

Кышка әҙерлекте көсәйтергә

Белорет предприятиелары 1948 йылдың беренсе кварталында эҙ әҙерлек менән эшләнеләр. Беренсе кварталда ҡалаһыҙ ҡал итеүсе предприятиеларҙе — металлургия, «Кокс-сыбык» һәм Тирлән заводтары һәм алдынғы буйынса бурысы булып ҡалдылар. Тимер юлы ғафу итеү мәҫьәлек насар эшләне. Былар бөтәһе лә үткән йыл ҡышҡы шарттарҙа эшләүгә тейешле әҙерлектең тәьмин ителмәүе һөҙөмтәһе булып тора.

Быйыл үткән йылғы хаталарҙы ҡабатламаҫҡа, ҡышҡы осорҙа эшләүгә серьеҙ әҙерлек алып барырға кәрәк. Белорет тимер юлының нормаль эшләүе өсөн бөтә шарттар булыуға ҡарамаҫтан, ҡышҡа әҙерлек буйынса эш бик насар бара әле. Металлургия комбинатында ҡышҡы айҙар өсөн кәрәк булған [illegible] тонна мазут, бик аҙ ҡуламда күмер һәм башҡа материалдар запасы булдырылған, Тимер юлы көнбайыш ҡалдырылған вагондар һәм яңы ягылып утеклә, улар бары ла ҡыуалған һәм аҙ ҡуҙғалған, вагондар бик түбән әле. Вагон ҡаршының тулы көҫәтен файҙалана алмау арҡаһында тик бер айҙа ғына 5000 тонна йөк килтерелмәй ҡалды.

Тимер юлда ойошҡанлыҡ етешмәй. Поездарҙың йөрөү графиктары өҙөлә. Тимер юлда социалистик ярыш ойошторолмаған. Партия ойошмаһының ойошторолған роле бик түбән. Масленников, Перменев кеүек алдынғы машинистарҙың тәжрибәләре ҡалған машинисторға араһында таратыу саралары үткәрелмәй.

Тимер юлда ҡышҡа әҙерлек эше лә бик һүлпән бара. 12 паровозға капиталь ремонт үткәреле бар әле. Уның тик береһе генә ремонттан сығарылған.

Белорет предприятиеларының ҡышҡа етерлек запас булмауы, ул беренсе һөҙөмтә тимер юлдың үҙендә лә һәм заводтарҙа ла предприятиеларҙа булған байлыҡты экономиялы файҙалана белеүгә лә бик бәйләнгән. Тирлән заводы быйыл 325 тонна күмер планлап тыш яндырған. Белорет тимер юлы планға ҡарағанда күмерҙе ике тапҡыр артыҡ тотона. Тимер юлда 4 паровоз артыҡ йөрөй. «Кокс-сыбык» ҡабат заводында ике ваҡыт күмер яндырыу урынына көн һайын дүртәр вагон күмер яндыралар. Алмаштар килтерелгән күмер менән ҡалаһыҙ ҡулланылла коммуналь хужалыҡ йорттары йылытыла. Белорет утынға мохтажлыҡ кисермәй ни? Әгәр үҙ ваҡытында тикшереп өҫтәмә күмер килтерелгән йорттарҙы утын менән ягылһа, ҡыш буйына күмер арыу экономиялы булыр. Был заводтарҙа ҡыш буйына мыҡты ҡулланыла. Ҡышҡы 3—4 айҙа ғына 109 тонна тик күмерҙе «Кокс-сыбык» заводы 580 тонна мазутты артыҡ тотонған.

Быйыл Белорет предприятиелары күрһәтелгән етешһеҙлектәргә ҡаршы ныҡлы көрәш алып барыу юнәлешендә, тимер юл менән килтерелгән һәр бер тонна материалды экономиялы тотоноу Белорет тимер юлының йөк ташыу һөҙөмтәләре артабан үҫтереү юнәлешендә бик барылырға тейешле.

М. Хәйдәров.

Хәйбуллала связь эшенә иғтибар итмәйҙәр

Совет Хөкүмәте колхоз ауылында связь эшенә бик яҡлап үҫтереүгә айырыуса иғтибар бирә. Бының өсөн тик бер генә мисалды күрһәтеп үтеү ҙә етә. Мәсәлән, быйыл беҙҙең Хәйбулла районында связь бүлектәренең телефонлаштырыуға государство тарафынан 100 мең һумға яҡын средство бүленде. Динамо машина, радио аппаратуралар алынды. Корреспонденцияларҙы газета һәм журналдарҙы халыҡҡа тиҙерәк еткереү өсөн авиапочта бәйләнеше булдырылды. Ошонан һөҙөмтәһендә районда хеҙмәтләндереү [illegible] роуға ҡарамаҫтан, ә[illegible] газеталарҙы сыҡҡан көнөнә үк алып уҡый алалар. Былар, партияның һәм хөкүмәтебеҙҙең хостарлек күрәүҙәренең һөҙөмтәһе булып тора.

Связь эше ауылда ҙур государство әһәмиәтенә эйә булып торуына ҡарамаҫтан, шулай ҙа ауылдарҙа күп кенә ауыл Советтәре исполкомдары, колхоздарҙың етәкселәре уны баһалап еткермәйҙәр әле. Был фактылар деревлайҙар. Федоровка ауыл Советы исполкомы почта бүлексәһе өсөн хатта бөгөнгә кәнгә тиклем бер бина ла бүлеп биргәне юҡ.

Әбеш, Антинган ауыл Советтәрендә почта бүлексәһенә эшләү өсөн уңайлы урын юҡ. Улар исполкомдарҙың проходной бүлмәләренә урынлаштырылғандар. Әбеш ауыл Советендәге «Победа», «Урнәк», «Урал» колхоздарының председателдәре хатта почта йөрөтөүгә беркетелгән аттарын да кире алдылар. Хәҙер почта-хат йөрөтөүселәргә йәйәү 20—30-ар километр йөрөргә тура килә. Шуларҙан корреспонденцияларҙы адресатына бик һуңлап еткерәләр.

Аҡъюл, Иләс, Мамбәт ауыл Советтәренең етәкселәре лә ошоға тиклем хат ташыусы кешеләр билмәйҙәр. Һөҙөмтәлә колхозсыларҙың хат, газеталар алыуға бүлексәгә эштәрен ташлап йөрөргә мәжбүр булалар. «Яңы юл». Сталин исемендәге колхоздарҙан почта йөрөтөү өсөн Халиқ станцияһы менән Аҡъяр трактыйына беркетелгән аттар. Ләкин колхоз председателдәре [illegible], Тимерғәлиев [illegible] ҡына тоталар.

Быйыл дүрт ауыл Советы — Федоровка, Антинган, Аҡъюл, Юлбарыҫ ауыл Советтәрен телефонлаштырыу планлаштырылды. Был эш беренсе кварталда уҡ тамамланырға тейеш ине. Ләкин эш әле — баганалар, тимер сымдар әҙер. Ләкин ауыл Советтәре исполкомдарының иғтибарһыҙлыҡ арҡаһында эш һаман да әле башланмай ҡала.

Район Советы башҡарма комитеты кеше яҡшыртыу, юлға һалыу өсөн бергә, связь работниктарына, урындағы Советтарға, колхоз етәкселәренең реаль ярҙамы талап ителә. Беҙҙеңсә, был мәсьәлә менән беренсе нәүбәттә район Советы исполкомы ҡыҙыҡһынырға һәм конкрет саралар күрергә тейеш, тип уйлайбыҙ.

Т. Тимербулатов,

Район связь контораһы начальнигы.

Орденле оператор

Партком бүлмәһенә еңел генә ҡаүҙәле, янып торған ҡара күҙле, нефткә махсуслаған эш кейемендә берәү килеп инде.

— Иптәш секретарь, — тине ул, асыҡ тауыш менән, — һеҙҙең саҡырыуығыҙ буйынса килдем. Тик шуныһы, һеҙ мине оҙаҡ тотмаһағыҙ ине. Тап ярты сәғәттән мин смена ҡабул итергә тейешмен.

— Юҡ, оҙаҡ тотмабыҙ, — тип яуап ҡайтарҙы партком секретаре, һәм миңә ҡарап:

— Бына, беҙҙең Ғәли Бикметов ошо була инде...

...Мин уның ябай, ягымлы һәм шат йөҙөнә ҡарап, әле генә партком секретаре һөйләп үткән тиҫтәләрсә маҡтау һүҙҙәрен хәтерҙән ҡабатлап сыҡтым.

Черниковск нефть эшкәртеү заводының иң алдынғы өлкән операторҙарынан береһе ул. Ул бында ошо завод һалынған көндән бирле эшләй.

Күптән генәме әле ауыл егете, комсомолец Ғәли ҡатмарлы техникаға эйә булырға, шаулап, гөрләп торған машиналар янында эшләргә теләне. Һәм был теләге уны ошо заводҡа килтерҙе. Эш менән ҡайнап торған завод тормошо етеҙ, шат, шаян егеттең күңелен тиҙ үк үҙенә тартты. Ғәли бөтә йәшлек дәртен һалып, нефть эшенә өйрәнергә тотондо. Заводтың партия, комсомол ойошмалары уға был эштә бөтә булған ярҙамды күрһәттеләр.

— Ошондай тере, шаян малайҙан кеше сыға торған. Уҡырға ебәрергә кәрәк үҙен, — тине партком секретаре. Ғәлиҙе Кавказға — Грозныйға операторҙар курсына ебәрәләр. Ул уҡып бөтөп, оператор булып ҡайтыуға завод та төҙөлөп бөтөп, хоҙҡа ебәрелде. Ошо көндән алып иптәш Бикметов заводта оператор булып эшләй. Завод менән бергә данлы көрәш һәм уңыш юлын үтте, иң алдынғы өлкән оператор булыуға өлгәште.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында нефть промышленносе предприятиелары һөйөклө Ватан, тыуған Совет Армияһы ни тиклем талап итһә, шул тиклем нефть биреү өсөн социалистик ярышҡа сыҡтылар. Черниковск нефть эшкәртеү заводы коллективы үҙенең намыҫлы эше менән ошо ярышта Государство Оборона Комитетының күсмә Ҡыҙыл Байрағын яулап алды. Ә стахановсы оператор Ғәли Бикметов ойошторған йәштәр бригадаһы социалистик ярышта Бөтә Союз күләмендә икенсе урынды алып килде.

Завод һуғыштан һуң да үҫеүендә, алға барыуында дауам итә. Сталиндың яңы биш йыллыҡ күйған бөйөк бурыстарҙы уңышлы үтәй бара. Коллективтың күренекле эшен юғары баһалап, СССР Верховный Советы Президиумы ошо йылдың май айында был заводты Ленин ордене менән наградланы.

Алдынғы заводтың алдынғы кешеләре лә наградландылар. Өлкән оператор Ғәли Бикметовтың күкрәгең биҙәп торған бер нисә медаль янына тағы бер орден өҫтәлде. Хәҙер уның күкрәгендә намыҫлы хеҙмәт билдәһе — Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ ордены балҡып тора.

Коммунист Бикметов стахановсы эшсе булыу менән бергә, заводтың общественный тормошонда — партия, комсомол ойошмаларының эшендә лә актив ҡатнаша. Коллектив уға ҙур ышаныс күрһәтте. Урындағы Советтәргә һайлауҙар ваҡытында ул Черниковск ҡала Советына депутат итеп һайланды.

— Һеҙ производствола был уңыштарға ниндәй юлдар менән ирештегеҙ? — тип һорайһығыҙ, — ти иптәш Бикметов, ҡыҙарып төшөп. — Мин, әлбиттә, тукта, алдынғылыҡ алайым әле, маҡталайым, тип эшләмәйем. Мин тик эште урынына еткереп эшләргә генә яратам. «Минә киткәнсе, эйәһенә еткәнсе», тип эшләргә яратмайым. Сөнки мин бит байға эшләмәйем. Үҙем өсөн, үҙ государством өсөн эшләйем. Шуға күрә, һәр бер насар башҡарылған эш мине көйөндөрә, яҡшы итеп, урынына еткереп башҡарылған эш һөйөндөрә, йән аҙығы бирә, шатландыра.

— Яҡшы эшләр өсөн, әлбиттә, үҙ эшеңде яҡшы белеү кәрәк, — тип дауам итә иптәш Бикметов. — Шуға күрә мин үҙем эшләгән установканың техникаһын бөтә нескәлектәренә тиклем беләм. Уның эшләп сығарыу мөмкинлеген тулыһынса файҙаланам. Операторлыҡ эшенең бөтә техникаһына эйә булыуҙа миңә Грозныйҙан килгән ҡарт операторҙарҙан Рыбалченко һәм Петр Федорович Воняшин иптәштәр ҙур ярҙам иттеләр. Улар был эштә 20—30-ар йыл эшләгән һөнәрсе, ҡарт мастерҙар ине. Мин улар урыныла тәрбиәләндем.

Иптәш Бикметов үҙе генә түгел, үҙ бригадаһындағы бөтә иптәштәрен дә үҙ эшенең техникаһын яҡшы белеүҙәренә, эште һәйбәт белеп, урынына еткереп эшләүҙәренә ирешергә тырыша. Уның бригадаһында бөтә эш техник карта буйынса урынына еткереп эшләнә. Эш сәғәтенең һәр бер минуты эш өсөн файҙаланыла. Эш ваҡытында туҡтап тороу, буш сыуалып эш сәғәтен әрәм итеү кеүек насар күренештәргә һис бер юл ҡуйылмай.

Бригада техниканы камиллаштереү, юғалтыуҙарҙы булдырмау, продукцияның үҙенә төшөү хаҡын кәметеү, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өсөн даими көрәш алып бара.

Эште дөрөҫ ойоштороу, совет кешеләренә генә хас булған дәртлелек, намыҫлылыҡ менән эшләү арҡаһында, орденле оператор Ғәли Бикметов эштә план тултырмау, артта ҡалыу тигән нәмәне белмәй.

Шуға күрә лә уның данлы заводтың даны менән бергә үрелеп барған алға, тағы ла ҙурыраҡ еңеүҙәргә табан үҫә бара.

З. Бишева.

Өлкә партия ойошмаһында пропаганда һәм агитация эшенең торошо һәм уны көсәйтеү саралары тураһында

ВКП(б) Өлкә Комитете пленумында ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда буйынса секретаре иптәш F. Ф. Шафиковтың һөйләгән докладыᐩ

Пропаганда

Һуғыш йылдарында һәм һуғыштан һуңғы төҙөлөш осоронда партия сафтары һан яғынан бик ныҡ үҫте. Беҙҙең партиябыҙ үҙ тарихында бындай көслө үҫеүҙе күргәне юҡ ине әле. Был беҙҙең партия ойошмаһында ла шулай булды. Үткән һигеҙ йыл ваҡыт эсендә республикабыҙҙа коммунистәр һаны ике тапҡырҙан да артыҡҡа үҫте һәм хәҙерге ваҡытта уның сафында 9 мең самаһы кеше бар.

Партияның тәүге ойошмалары һаны ла ике тапҡырҙан күберәккә үҫте.

Коммунистарҙың 70 процент самаһы партияға Ватан һуғышы һәм һуғыштан һуңғы осорҙа инде. Беҙҙең партиябыҙ государство өсөн иң ҡурҡыныслы булған дәүерҙә үҫте. Шулай булғас, был үҫеү беҙҙең халҡыбыҙҙың иң тоталаҡлы һәм Ленин — Сталин эшенә иң бирелгән вәкилдәре иҫәбенә барҙы.

Ләкин был үҫештең ҡайһы бер кире яҡтары ла бар. Улар шунан тора: партияның һан яғынан үҫеүе, партия ойошмаларының сифатын үҫешенсә нығытыу менән, коммунистарҙе идея яғынан, марксистик-ленинсе рухта тәрбиәләүҙе тейешенсә көсәйтеү менән бергә алып барылманы. Хатта киреһенсә лә булды. Был үҫеш партия-ойоштороу һәм партия-политик эштең түбән кимәлдәге шарттарында барҙы. Ошо сәбәп менән хәҙер партия үҙ сафтарын үҫтереүҙе артабан ҡыҫыулатыуҙы түгел, ә партия ағзаларын һәм кандидаттарын политик яҡтан ағартыуҙы, коммунистарҙың политик кимәлдәрен күтәреү эшен көсәйтеүҙе күҙҙә тота.

Беҙҙең өлкә партия ойошмаһында коммунистарҙе политик яҡтан ағартыу эше нисек тора һуң?

Партия конференциялары үткәндән һуң коммунистарҙе политик ағартыу эшенә партия ойошмаларының һәм партия комитеттарының иғтибары һиҙелерлек рәүештә көсәйҙе һәм шул нигеҙҙә партия мәғарифе селтәренең эше байтаҡ яҡшырҙы. Был нимән ғибарәт һуң? Үткән йылда 55 мең коммунист уҡыған булһа, быйыл политик уҡыуҙың төрлө селтәрҙәрендә 70 мең самаһы коммунист уҡыны. Үткән йыл 542 политик мәктәп эшләгән булһа, быйыл 872 политик мәктәп ойошторолдо һәм улар ойошҡаныраҡ рәүештә эшләнеләр. Политик мәктәптәрҙә 10 мең 900 коммунист уҡыны. 687 политик мәктәп үҙенең эшен уңышлы тамамланы, улар 7 мең 640 коммунисте уҡытып сығарҙылар. Үткән йыл шул уҡ ваҡытта политик мәктәптәрҙе 5340 коммунист тамамлағайны.

Иптәш Сталин биографияһын өйрәнеү буйынса 14300 кешенән торған 980 түңәрәк тә шулай уҡ үҙенең эшен тамамланы. 76 район кискә партия мәктәбе ойошторолғайны. Шуны әйтергә кәрәк—район партия мәктәптәре беҙҙең пропаганда эшендә бик ныҡлы урын алды. Партия мәктәптәренең һаны, үткән йылға ҡарағанда, 12-гә, ә унда тыңлаусылар һаны 1726-нан 2044 кешегә артты. 1 июнгә 57 район партия мәктәбе үҙенең эшен уңышлы тамамлап, үткән йылға ҡарағанда, байтаҡ артыҡ — 1370 кеше уҡытып сығарҙы. Икенсе төрлө итеп әйткәндә, хәҙер политик мәктәптәр һәм район партия мәктәптәре ойошҡаныраҡ эшләй башланылар. Шулай ҙа 19 мәктәп үҙенең эшен оҙаҡҡа һуҙҙы.

ВКП(б)-ның Өфө һәм Черниковск ҡала комитеттәре ҡаршында ике йылға иҫәпләнгән программалы киске марксизм-ленинизм университеттәре эшләй.

Был университеттәрҙә үткән йылда 116 кеше уҡыған булһа, быйыл 180 кеше уҡый.

Шуны әйтергә кәрәк, «Коммунистар партияһы манифесенең» сығыуына йөҙ йыл тулыу айҡанлы партия ойошмаларында ҙур пропагандистик эш алып барылды. Бөтә ҡалаларҙа һәм райондарҙа, уларҙың уҡыу йорттарында һәм бөтә партия ойошмаларында «Коммунистар партияһы манифесенең» йөҙ йыллығы тураһында партия актив йыйылыштары, партия йыйылыштары, теоретик конференциялар үткәрелде.

Күрһәтеп үтергә кәрәкле булған ҡайһы бер ыңғай моменттар шулар.

Ләкин пропаганда эшен күтәреүгә йүнәлтелгән тәүге серьез саралар тураһында ғына һүҙ бара әле. Сөнки коммунистарҙе ағартыу эшенең торошон тулыһы менән алғанда, беҙ әле ҡәнәғәтлә-нерлек тип иҫәпләй алмайбыҙ. Быныҡ сәбәбе түбәндәгеләр.

Беҙҙең беренсе иң ҙур етешһеҙлегебеҙ — ВКП(б) Үҙәк Комитетенең «Марксизм-ленинизмде пропагандалауҙың нигеҙе итеп «Бөтә Союз Коммунистар (большевиктар) Партияһы тарихенең ҡыҫҡаса курсын» алырға» тигән күрһәтмәләрен еренә еткермәүҙә.

Политик мәктәптәр селтәренең сағыштырмаса ойошҡан рәүештә эшләүҙәрен беҙ әйтеп киттек, уларға етәкселек итеү өсөн райкомдарҙың бөтә пропагандистәре файҙаланыла һәм уларҙың эштәрен райкомдар күҙәтеп бара. Ләкин Ҡыҫҡаса курсты өйрәнеү түңәрәктәренең эше бөтөнләй киреһенсә тора. Был түңәрәктәр ҡәнәғәтләнерлек эшләмәйҙәр, Ҡыҫҡаса курстың беренсе главаларынан үтә алмайҙар. Уҡый алырлыҡ тейешле контингент булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙә юғары типтағы түңәрәктәр бөтөнләй юҡ тип әйтерлек.

Икенсенән, быйыл ойошторолған 962 түңәрәктән бары тик 214-е генә, йәғни биштән бер өлөшө генә, үҙенең эшен тамамланы.

Өсөнсөнән, Ҡыҫҡаса курсты үҙ-ләгенән өйрәнеү эше ҡәнәғәтләнерлек ойошторолмаған.

Күп кенә ҡалаларҙа һәм райондарҙа, мәҫәлән, Өфөлә, Октябрьскиҙә, Черниковскиҙә, Белореттә, Туймазы һәм Мәсетле райондарында марксизм-ленинизм теорияһын үҙ алдарына өйрәнеүселәргә ярҙамға лекциялар һәм консультациялар үткәрелә, даими хәрәкәт итеүсе семинарҙар ойоштороло, индивидуаль беседалар үткәрелә һәм иптәштәрҙең үҙ өҫтәрендә нисек эшләүҙәре һәм уларҙың белемдәре ни дәрәжәлә булыуы ныҡлап тикшерелә.

Ләкин беҙҙә әле ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын үҙ алдарына өйрәнеүсе коммунистарҙан уны уҡыу эшен тулыһынса тамамлаусы иптәштәр бик аҙ. Мәҫәлән, Абзан районында 27 кеше, Стәрлебаш районында — 52, Учалыла — 60, Иглинда — 32 кеше, Өфөлә — 1005 кеше ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын өйрәнеү эшен тамамланы.

Был етешһеҙлекте бөтөрөргә, эште ВКП(б) Үҙәк Комитете талап иткәнсә ҡайтанан ҡорорға, ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын ентекләп өйрәнеүгә, был эшкә һәләтле бөтә коммунистарҙе йәлеп итергә кәрәк. Бындай иптәштәр нисәүҙәр һәм был эште нисек ойоштороорға?

1. Беҙҙең урта һәм юғары мәғлүмәтле 15 мең самаһы коммунисебеҙ бар. Бынан тыш, Ҡыҫҡаса курсты өйрәнеү буйынса түңәрәктәрҙе тамамлаған бер нисә мең коммунист бар. Был иптәштәр Ҡыҫҡаса курсты беренсе сығанаҡтарҙы файҙаланып үҙ алдарына өйрәнерлектәр. Был иптәштәргә лекциялар уҡыу һәм консультациялар үткәреү юлы менән ярҙам күрһәтеүҙе тәьмин итергә кәрәк.

Парткабинеттәр ҡаршында әҙерлекле консультанттар группаһы булдырып, уларға 1-2 партия ойошмаһынан 8-әр — 10-ар коммунист беркетергә кәрәк.

Үҙ алдарына уҡыу ентекләп ойошторолорға һәм Устав талаптары нигеҙендә коммунистарҙың уҡыуҙарына ныҡлы контроль тәьмин ителергә тейеш.

ВКП(б) тарихенең ҡыҫҡаса курсын пропагандалау өлкәһендә беҙҙең тарафтан юл ҡуйылған етешһеҙлектәрҙе төҙәтеп, Ҡыҫҡаса курсты өйрәнеү түңәрәктәренең селтәренең нормаль эшләүҙәренә әҙерлекте хәҙерҙән башларға, уларҙың эштәрен сентябрь, октябрь айҙарынан уҡ башлап алып китергә кәрәк.

Был түңәрәктәр селтәрен хәҙер үк билдәләргә һәм пропагандистәр активен, түңәрәк етәкселәрен һайлап алып, уларҙы бюрола раҫларға кәрәк. Был иптәштәрҙе июнь айында уҡ билдәләп ҡуйырға һәм 2-3 ай эсендә — июль, август һәм сентябрь айҙарында уларҙы түңәрәктәргә етәкселек итеү эшенә әҙерләргә кәрәк.

Аҙаҡ килеп, түңәрәктәрҙең эшенә регламент билдәләргә кәрәк. Тәжрибә шуны күрһәтә — эште ҡәнәғәтләнерлек ойоштороғанда, Ҡыҫҡаса курсты 6—7 ай эсендә өйрәнергә мөмкин. Ошонан сығып ҡағиҙә рәүешендә, түңәрәктәр үҙҙәренең эштәрен сентябрь — октябрь айҙарында башлап, уны апрель айында тамамларға тейештәр.

Беҙгә политик мәктәптәрҙә 30 меңгә яҡын коммунисте уҡытыу талап ителәсәк. Политик мәктәптәр селтәрен билдәләргә һәм уларҙың етәкселәрен һайлап [illegible] кәрәк. Улар өсөн семинарҙарҙы һуңыраҡ үткәрәсәкбеҙ.

Икенсе ҙур етешһеҙлек һәм коммунистарҙе политик яҡтан ағартыу эшенә ҡомасаулаусы ауырлыҡ, шунда—партияның күп кенә райкомдары ВКП(б) Үҙәк Комитетенең — «Бөтә коммунистәрҙе политик уҡытыу менән тулыһынса солғап алыуға өлгәшергә, уларҙың үҙҙәренең идея-политик кимәлдәрен нисек күтәреүҙәрен ысынлап тикшерергә»,—тигән күрһәтмәһен үтәмәйҙәр.

Пропаганда эшендә райком секретарҙәренең насар ҡатнашыуҙары шул уҡ категориялағы етешһеҙлектәргә инә. Райком секретарҙәренән бары тик 47 кеше генә район партия мәктәптәрендә лекция уҡыйҙар, семинарҙарға етәкселек итәләр һәм башҡалар.

Бында ошондай ғына һығымтаға килергә мөмкин — партия райкомдары һәм горкомдары ВКП(б) Үҙәк Комитетенең коммунистарҙе политик яҡтан тәрбиәләүгә ныҡ иғтибар бирергә тигән директиваһын серьез рәүештә тормошҡа ашырһындар, пропаганда эшенең асылына төшөнһөндәр, партия Уставын тормошҡа ашырыу нигеҙендә һәр бер коммунистең политик уҡыуын тикшереп торһондар.

Беҙҙең эшебеҙҙәге өсөнсө ҙур етешһеҙлек шунан тора — штаттан тыш пропагандистәр активе менән эш йомшаҡ ҡуйылған.

Был эшкә мәктәп директорҙарын, уҡытыусыларҙы, партия райкомдарының работниктарын, МТС директорҙарының политик эш буйынса урынбаҫарҙарын һәм башҡаларҙы ылыҡтырырға кәрәк. Республикала бындай пропагандистәр активе 4,5—5 мең самаһы кеше кәрәк буласаҡ. Һәм хәҙерге ваҡытта пропаганда эшендә бөтә иғтибар ошо пропагандистәрҙе һайлап алыуға һәм июль, август һәм сентябрь айҙарында уларҙы әҙерләүгә йүнәлтелгән булырға тейеш. Бары тик ошо рәүештә әҙерләнгәндә генә, беҙ партия мәғарифе селтәренең эшен уңышлы йәйелдерә аласаҡбыҙ.

Район партия кабинеттәрендә семинарҙар үткәреү, беседалар [illegible] пропагандистәр активенең һәр береһенең эшен тикшереүҙе тәртипкә килтерергә кәрәк. Был эш партия кабинеттәренең эшендә нигеҙ урынды алырға тейеш.

Коммунистарҙе политик ағартыу эшенә ҡомасаулаусы дүртенсе ҙур етешһеҙлек — партияның күп кенә тәүге ойошмаларының коммунистарҙе политик яҡтан тәрбиәләү тураһында Устав талап иткән үҙ бурыстарын үтәмәүҙәрендә, коммунистарҙен политик уҡыуҙарына контроль яһамауҙарында.

Белорет металлургия заводының парткомы (секретаре ВКП(б) Үҙәк Комитете парторгы иптәш Широков) коммунистарҙың политик уҡыуҙарына насар контроллек итә, был мәсьәләгә тейешле талапсанлыҡ юҡ. Шул сәбәп менән заводтағы коммунистарҙың бер өлөшө бер ҡайҙа ла уҡымай һәм заводта партия мәғарифе селтәре насар эшләй.

Күп кенә колхоз һәм территориаль партия ойошмалары үҙҙәренең йыйылыштарында коммунистарҙың уҡыуҙары тураһындағы мәсьәләне тикшермәйҙәр.

Һәр бер партия ойошмаһы тегеһе йәки был коммунистең уҡыуын, түңәрәккә йәки политик мәктәпкә йөрөүен күҙәтеп тора ала һәм күҙәтергә тейеш.

Шуға өлгәшергә кәрәк — һәр бер партия ойошмаһы үҙенең йыйылыштарында был мәсьәләне тикшерһен, һәр бер секретарь был эш менән шөғөлләнһен, һәр бер коммунистең был өлкәлә Устав талаптарын үтәүен күҙәтеп торһон.

Унан ары, иптәш Сталин биографияһын өйрәнеү эшен бөтә хеҙмәтсәндәр өсөн клубтарҙа, уҡыу өйҙәрендә, ҡыҙыл мөйөштәрҙә һәм ойошмаған халыҡ араһында—айырым йорттарҙа ойоштороуҙы ла партияның тәүге ойошмаларына йөкмәтергә кәрәк.

Партия ойошмаһының пропаганда эшен уңышлы алып барыуына ҡомасаулаусы төп етешһеҙлектәр бына ошолар, һәм беҙ был етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өҫтөндә эшләргә тейешбеҙ.

Интеллигенция менән эшләү тураһында бер нисә һүҙ.

Өлгәшелгән ҡайһы бер ыңғай тәжрибәләрҙе файҙаланып, беҙ интеллигенция араһында эшләүҙе киң йәйелдерергә: уны марксизм-ленинизм рухында, совет патриотизме рухында тәрбиәләргә һәм пропаганда, агитация эшенә актив ҡатнашыуға ылыҡтырырға тейешбеҙ.

Уҡытыусылар кадрына айырыуса [illegible] Уҡытыусыларҙың тарихте һәм, бигерәк тә, диалектик һәм тарихи материализмде ныҡлап өйрәнеүҙәрен ойоштороорға кәрәк. Был бигерәк тә шуның өсөн кәрәк, сөнки уҡытыусылар йәштәргә белем биргәндә, бер үк ваҡытта уларҙа донъяға материалистик ҡараш, марксистик-ленинсе ҡараш тәрбиәләргә тейештәр. Ә уҡытыу процесен былай ойоштороу өсөн диалектик һәм тарихи материализмде тәрән рәүештә белеү шарт.

Һәм, аҙаҡ килеп, урта мәктәптәрҙә тарих, Конституция, әҙәбиәт һәм география уҡытыу эшенә контроль яһарға, был өлкәлә булған аполитичность элементтарен бөтөрөргә кәрәк.

Унан ары, партия һәм совет активе, инженер-техник интеллигенция араһында экономик белемдәрҙе пропагандалау эшен ойоштороорға кәрәк. Был маҡсат өсөн семинарҙар төҙөү үҙен аҡлай. Бөтә эре предприятиеларҙа, шулай уҡ партияның ҡала комитеттәре ҡаршында ла был семинарҙарҙы ойоштороорға кәрәк.

Агитация эше

Партия Өлкә Комитете халыҡ араһында массовый-политик эш алып барған ваҡытта ВКП(б) Үҙәк Комитетенең «Сталинград партия ойошмаһында агитаторҙар менән эшләүҙәге етешһеҙлектәр һәм был эште яҡшыртыу саралары тураһындағы» ҡарарын һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетенең һәм шулай уҡ XXI өлкә партия конференцияһының директиваларын ҡулланып эш итте.

Халыҡ араһында массовый-политик эште уңышлы рәүештә алып барыу өсөн беҙҙә ниндәй средстволар һәм көстәр бар?

1. Массовый-политик эштең төп средствоһы — ул матбуғат, газеталар.

Беҙҙә бөтәһе 370 мең дана үҙәк, өлкә, тармаҡ һәм район газеталары һәм 26 мең дана журнал бар.

Республиканың ҡалаларында һәм райондарында 40 меңдән артыҡ агитатор эшләй. Уларҙан 25 мең самаһы коммунист.

Массалар араһында политик эш алып барыуға күп һанлы интеллигенция: 17 меңдән артыҡ уҡытыусы, врач, агроном, 3 мең самаһы инженер һәм техник, шул тиклем үк хеҙмәткәр, йәғни интеллигенциянан 23 меңдән артыҡ кеше ылыҡтырылған.

Партияның район һәм ҡала комитеттәре ҡаршында 2800 кешенән торған докладсылар группалары бар.

Беҙҙең көстәребеҙ һәм средстволарыбыҙ ошондай. Уларҙы дөрөҫ файҙаланыу агитацион эште ҡәнәғәтләнерлек ойоштороуҙы тәьмин итә ала.

Һуңғы ваҡыттарҙа һәм, бигерәк тә, партия конференцияһынан һуң партия ойошмаларының массалар араһында политик эше бер ни тиклем көсәйҙе, был беҙҙең предприятиеләребеҙҙә хеҙмәт етештереүсәнлегенең үҫеүендә һәм яҙғы сәсеүҙә колхозсыларҙың, уҙған йылға ҡарағанда, тағы ла активерәк һәм ойошҡаныраҡ эшләүҙәрендә күренә.

Апрель һәм май айҙарында ҡалаларҙа һәм колхоздарҙа хеҙмәтсәндәрҙең йыйылыштары булып үтте. Бөтә колхоздарҙа ла, ҡағиҙә буйынса, колхозсыларҙың һәм ауыл хужалығы работниктарының иптәш Сталинға яҙған хаты тикшерелде һәм йөкләмәләр ҡабул ителде. Юғары урожай алған өсөн һәм малсылыҡта өлгәшелгән уңыштар һәм башҡалар өсөн Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме биреү һәм ауыл хужалығы алдынғыларын наградлау тураһында СССР Верховный Советы Президиумының Указы өйрәнелде.

Черниковск, Октябрьск һәм Белорет ҡала комитеттәре заводтарҙа, промыселдарҙа, төҙөлөш конторалараында эшселәрҙең йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәреүҙе тәьмин итәләр. Был мәсьәләлә Ишембай ҡала комитете башҡаларҙан айырылып тора, ул был эште тейешенсә ойоштора алмаған әле.

Ауыл ерҙәрендәге райкомдарҙан Саҡмағош, Стәрлетамаҡ, Бөрө, Мәсетле, Яңауыл һәм ҡайһы бер башҡа райкомдар колхозсыларҙың йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәреүҙе юлға һалдылар.

Политик докладтар менән хеҙмәтсәндәрҙең йыйылыштарын регуляр рәүештә үткәреү — ул иң яҡшы политик-тәрбиә сараһы булып тора. Партия конференцияларынан һуң был йүнәлештә яҡшы уҡ алға китеш бар. Был тәжрибәне нығытырға һәм һәр бер предприятиела һәм колхозда айына, кәм тигәндә, бер тапҡыр ошондай массовый йыйылыштар үткәреүҙе тәьмин итергә кәрәк.

Өлкә партия конференцияһынан һуң ВКП(б) Өлкә Комитете, Министрҙар Советы работниктары, күп кенә министрҙар заводтарҙа һәм колхоздарҙа политик докладтар менән йыш ҡына сығыш яһай башланылар. ВКП(б) Үҙәк Комитетенең һәм өлкә партия конференцияһының был директиваһын партияның Туймазы, Бөрө, Кариҙел, Дәүләкән, Салауат райкомдары секретарҙәре яҡшы үтәйҙәр.

Ләкин әле был эш дөйөм төҫ алғаны юҡ. Партия конференцияһының күрһәтмәләрен үтәмәүсе коммунистәр — етәксе работниктар аҙ түгел.

Партия конференциялары үткәндән һуң, партия комитеттәре агитаторҙарҙы һайлап алыу, уларҙың составын яҡшыртыу буйынса байтаҡ эш башҡарҙылар. Һөҙөмтәлә күп һанлы интеллигенция агитаторҙар сафына йәлеп ителде. Ләкин әле был эштең бер яғы. Эштең икенсе яғы — уларҙы тәрбиәләүҙә, уларға инструктаж үткәреүҙә һәм газета менән тәьмин итеүҙә.

Өлкә конференцияһының күрһәтмәләрен үтәй барып, ВКП(б)-ның Белорет, Стәрлетамаҡ һәм Октябрьск ҡала комитеттәре бер-нисә тапҡыр агитаторҙарҙың ҡала йыйылыштарын үткәреп, унда ағымдағы политика, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү предприятиеларҙың рентабеллеген үҫтереү, ошо йылдың программаһын ваҡытынан алда үтәү һәм ярыш ойоштороу мәсьәләләрен тикшерҙе.

Ишембайға килгәндә, унда икенде партияның ҡала комитете лә, тәүге ойошмалары ла, икенсе номерлы промысел менән нефть эшкәртеү заводын иҫәпкә алмағанда, агитаторҙарҙы тәрбиәләү һәм уларға инструктаж яһау эше менән серьез рәүештә шөғөлләнмәйҙәр.

Ауыл ерҙәрендәге күп кенә райкомдар яҙғы сәсеүгә әҙерләнеү ваҡытында ағымдағы момент һәм сәсеүҙә агитаторҙарҙың бурыстары тураһында агитаторҙар өсөн инструктив йыйылыштар үткәрҙеләр.

Ләкин, партияның Мәләүез, Благовещен, Әлшәй, Бәләбәй райкомдары бик аҙ ғына һандағы агитаторҙар менән йыйылыш үткәреп, был эшкә формаль ҡаранылар.

Шуға өлгәшергә кәрәк — агитколлективтарҙа агитаторҙарҙың ағымдағы политиканы һәм предприятие, колхоз алдында торған бурыстарҙы тикшереүгә арналған инструктив кәңәшмәләре аҙна һайын нормаль рәүештә үткәрелеп торһон. Һәр бер агитколлектив етәксеһен агитатор библиотекаһы менән, һәр бер агитаторҙы — агитатор блокноты менән һәм шулай уҡ өлкә йәки, һис юғы, район газетаһы менән тәьмин итергә кәрәк.

Политик информация заводта, колхозда, цехта, бригадала социалистик ярыш ойоштороу менән ярашытырып алып барылғанда ғына, агитацион эштең яҡшы һөҙөмтә биреүе мөмкин.

Беҙҙә күп кенә партия ойошмаларында ярышты оҫта ойоштороуҙың ҡиммәтле тәжрибәһе бар.

Нефть эшкәртеү заводында (Черниковск) етәкселәр һәм партия ойошмаһы (заводтың етәкселәре Осадченко һәм Минасян иптәштәр) ижади ярыш атмосфераһын булдырҙылар. Һәр бер айға һәр бер эшсе һәм цех алдына ярыштың асыҡ маҡсаты: программаны күпмегә арттырып үтәү өсөн, сифат күрһәткестәрен нисек яҡшыртыу өсөн көрәш алып барылаcағы билдәләп ҡуйыла.

Икенсе яҡтан, алдынғы стахановсыларҙың, операторҙарҙың, цех начальниктарының, рационализаторҙарҙың өлгәшкән уңыштары, яҡшы эш тәжрибәләре һәм эшкә индерелгән яңылыҡтары газеталар аша, агитаторҙар һәм производство кәңәшмәләре аша бөтә коллективҡа еткерелә. Һөҙөмтәлә завод программаны үтәү яғынан булһын, предприятиеның рентабеллеген күтәреү яғынан булһын бик яҡшы уңыштарға өлгәште. Ошоларҙың бөтәһе өсөн дә завод хөкүмәт тарафынан Ленин ордене менән наградланды.

Республикабыҙҙың ауыл эшсәндәре бөтә мөмкинлектәрҙе самалап, иптәш Сталинға хат яҙҙылар һәм юғары урожай алыуға өлгәшеү буйынса конкрет йөкләмәләр алдылар.

Иптәш Сталинға яҙылған хат — хәҙерге ваҡытта ауылда беҙҙең политик-массовый эшебеҙҙең үҙәге булып тора. Алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн көрәш — тормоштоң маҡсаты — һәр бер колхозсының, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙың, ауыл хужалығы работнигының намыҫ эше булырға тейеш.

Ауыл хужалығы йылының иң көсөркәнешле хәл итеүсе осоро — ашлыҡтарҙы утау, пар һөрөү, бесән сабыу һәм урожай йыйнау эштәре башлана. Ауылдағы эшкә һәләтле бөтә халыҡтың был эштәрҙә актив ҡатнашыуы, улар араһында иптәш Сталинға яҙған хатта алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн социалистик ярыш йәйелдереү эштең уңышын хәл итәсәк. Ауылдағы бөтә коммунистарҙен, агитаторҙарҙың, район газеталарының иғтибары ошо бурысты хәл итеүгә йүнәлдерелергә тейеш.

Агитаторҙарҙың район һәм куст йыйылыштарын үткәрергә, унда ағымдағы политика мәсьәләләрен һәм шулай уҡ иптәш Сталин алдында алынған йөкләмәләрҙе үтәү өсөн колхоздарҙа яңы ойоштороу буйынса агитаторҙарҙың бурыстары тураһындағы мәсьәләләрҙе тикшерергә кәрәк.

Бөтә колхоз һәм территориаль партия ойошмалары урожай йыйнауға әҙерләнеү һәм уны үткәреү осоронда күпселек колхозсыларҙың, бригадаларҙың һәм звеноларҙың ярышта ҡатнашыуын тәьмин итерлек массовый-политик эш алып барыу пландарын ҡарап сығырға тейештәр.

Ауыл хужалығын үҫтереүҙә ҙур эштәр башҡарыусы намыҫлы колхозсылар менән бер рәттән, һәр төркөм эрем танаҡтар һәм ялҡауҙар ҙа бар әле. Быға тиклем беҙҙең массовый-политик эшебеҙ ул кешеләрҙең общественноска ҡаршы эштәрен күрмәйенсә килде. Был дөрөҫ түгел. Бөтә иғтибарҙы алдынғыларға ғына бирел, беҙ намыҫлы хеҙмәтте һәр кемдең бурысы итеп түгел, ә инициатива эше итеп кенә күрһәтәбеҙ.

Үҙебеҙҙең агитация эшебеҙ иң үткер яғын колхоздарҙа намыҫлы хеҙмәттән баш тартыусы, общественноска ҡаршы эрем [illegible] маҡлыҡ тормошо менән йәшә[illegible] кешеләрҙе фаш итеүгә һәм у[illegible] ҙы аяуһыҙ тәнҡитләүгә йүнәлде[illegible]гә тейешбеҙ.

Алдынғы тәжрибәне пропагандалау социалистик ярышты ойоштороу буйынса агитация эшенең мөһим өлөшө булып тора. Б[illegible] эштә матбуғат ҙур роль уй[illegible].

Район газеталарынан—Яңауыл, Дәүләкән һәм Туймазы газеталары ысын-ысындан алдынғы тәжрибә трибунаһы булып торалар.

Ләкин күп район газеталарына әле был сифат етешмәй.

Хөкүмәт бер төркөм нефтсеәләргә һәм ауыл эшсәндәренә Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирҙе. Был кешеләрҙең тәжрибәһе республикабыҙҙың бөтә хеҙмәтсәндәренә еткерелергә тейеш.

Ләкин, уларҙың тәжрибәһен пропагандалау өсөн әле бик аҙ эшләнгән. Был эштә Башгосиздат та бик аҙ[illegible] ҡуҙғала, ул Башҡортостандың Социалистик Хеҙмәт Геройҙары тураһында бер генә брошюра ла сығарғаны юҡ.

Ауылдарҙағы клубтар һәм уҡыу өйҙәре — ауылда культура-ағартыу эшенең үҙәге, урындағы халыҡты культура яғынан үҫтереү һәм ағартыу урыны булып торалар.

Башҡортостан Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһы һәм уның начальнигы иптәш Шакиров, клубтарҙың, уҡыу өйҙәренең һәм башҡаларҙың эштәрен [illegible] килтереү өсөн ҡала һәм район исполкомдары эргәһендә ойошторолған культура-ағартыу эштәре бүлектәре бик [illegible].

Партия совет халҡын коммунистик рухта тәрбиәләүҙе социализмдың төп маҡсаттарының береһе итеп күрә. Беҙҙең өлкә партия ойошмаһы республика хеҙмәтсәндәрен политик тәрбиәләү буйынса был ауыр бурысты шулай итеп хәл итергә тейеш, был йүнәлештә коммунизм интерестәре талап иткән уңыштарға өлгәшерлек булһын.

Икенсе яҡтан, биш йыллыҡ план Башҡортостан хеҙмәтсәндәренә промышленносте һәм ауыл хужалығын үҫтереү буйынса ҙур бурыстар йөкмәтте. Уларҙы үтәү ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәренән бик ҙур өҫтәмә көс һалыуҙы талап итә. Бөтә өлкә партия ойошмаһы һәм һәр бер коммунист барлыҡ эшселәрҙең, колхозсыларҙың һәм интеллигенцияның политик [illegible]лығын һәм патриотик энтузиазмын күтәреү буйынса фидакәр рәүе[illegible] эшләһә генә, был бурыстар у[illegible]лы рәүештә хәл ителәсәк.

Ленин—Сталин партияһы [illegible] боевой отряды — беҙҙең [illegible] партия ойошмаһы сталинсе [illegible] Үҙәк Комитет етәкселегендә у[illegible] бурыстарын һам[illegible] генә беҙ [illegible]

ᐩ Доклад ҡыҫҡартылған стенограмма буйынса басыла.

Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы

Маршал Соколовскийҙең приказы

БЕРЛИН, 23 июнь. (ТАСС). Бөгөн Берлиндә Германиялағы совет хәрби администрацияһының баш начальнигы маршал Соколовскийҙең Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы үткәреү тураһында 111-се номерлы приказы халыҡҡа иғлан ителде.

Германияның көнбайыштағы оккупацияланған зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәрелде. Илдең төрлө райондары араһындағы экономик бәйләнештәрҙең нигеҙе булған аҡса әйләнешенең берҙәмлеге боҙолдо. Германияның берҙәмлегенә емергес удар яһалды. Контроль механизм тураһындағы килешеү һәм Германия берҙәмлеген һаҡлауҙы күҙҙә тотоусы Потсдам килешеүе боҙолдо. Көнбайыштағы оккупацияланған зоналарҙа сепаратный аҡса реформаһы үткәреү Германияны бүлгеләүҙе төгәлләй.

Америка, Британия һәм Францияның оккупацион властары, немец халҡының интересларына ҡапма-ҡаршы рәүештә, Германияны бүлгеләргә һәм көсһеҙләндерергә һәм уны экономик яҡтан ҡол итергә тырышыусы Америка, Британия һәм Франция монополияларына ыңғай итеп сепаратный аҡса реформаһы үткәрҙеләр. Көнбайыш Германияла үткәрелгән сепаратный аҡса реформаһы шулай уҡ фашизмдең власть башына килеүен тәьмин иткән, икенсе бөтә донъя һуғышын әҙерләгән һәм уны башлап ебәргән, ә хәҙер Көнбайыш Германияны империалистарҙың ҡоллоҡҡа төшөүенә булышлыҡ итеүсе эре герман капиталы вәкилдәренең һәм юнкерҙәренең позицияларын нығытыуҙы ла үҙенә маҡсат итеп ҡуя.

Германияла совет хәрби администрацияһы, Совет Хөкүмәтенең күрһәтеүҙәренә ярашлы рәүештә, Германияның оккупацияланған башҡа зоналарында сепаратный аҡса реформаһы үткәреүгә ҡаршы сыҡты һәм дөйөм Германия өсөн аҡса реформаһы үткәреүҙе талап итте. Бөтә Германия өсөн берҙәм аҡса реформаһы үткәреү мөмкин ине һәм Германия өсөн бик кәрәк ине. Контроль Советта дөйөм Германияла аҡса реформаһы үткәреүҙең төп принциптәре буйынса килешеүгә өлгәшелгәйне. Ләкин дөйөм Германияла аҡса реформаһы үткәреү тураһында төп элементәрендә әҙерләнгән дүрт яҡлы килешеү Америка, Британия һәм Франция оккупацион властары тарафынан өҙөлдө.

Килеп тыуған был хәл бөтә Германияның тыныс экономикаһын нормаль рәүештә аяҡҡа баҫтырыуға һәм үҫтереүгә серьез ҡурҡыныс булып тора.

Был шарттарҙа Германиялағы совет хәрби администрацияһы немец демократик общественносенең талаптарын яҡлап, немец халҡының интерестарын һәм совет оккупацион зонаһы һәм Ҙур Берлин районының экономикаһын һаҡлау өсөн кисектергеһеҙ саралар күрергә мәжбүр. Шуға күрә, совет хәрби администрацияһы Германияның совет оккупация зонаһында аҡса реформаһы үткәреү тураһында немецтарҙың экономик комиссияһы тәҡдимен ҡабул итә.

Германияның көнбайышындағы оккупацияланған зоналарында сит ил һәм немец монополиялары интерестарында үткәрелгән сепаратный аҡса реформаһынан айырмалы рәүештә, Германияның совет оккупацион зонаһындағы аҡса реформаһы хеҙмәтсән халыҡтың интерестарын һәм социаль ғәҙеллек принциптарын һәм Германияның тыныс экономикаһын тиҙерәк аяҡҡа баҫтырыу һәм үҫтереү кәрәклеген иҫәпкә алыуға нигеҙләнгән буласаҡ. Совет оккупацион зонаһында үткәрелгән аҡса реформаһы әйләнештә булған аҡсалар һанын ҡыҫҡан рәүештә кәметергә һәм уны хужалыҡ үҫешенең талаптарына ярашлы хәлгә килтерергә тейеш. Шуның менән бергә, үҙ хеҙмәтсән халыҡ өсөн мөмкин тиклем аҙыраҡ юғалтыуҙар менән үткәрелергә тейеш. Аҡса реформаһы ваҡытында сараһыҙ булған юғалтыуҙарҙың төп ауырлығын һуғышта спекуляция һәм ҡара базарҙағы законһыҙ операцияларҙа байып ҡалған кешеләр күтәрергә тейеш. Аҡса реформаһы, бағыһынан элек халыҡ ҡулында булған алдынғы промышленность тармаҡтарын нығытыу нигеҙендә, хеҙмәтсән крәҫтиән хужалыҡтарын ныҡытыу һәм шулай уҡ тыныс хужалыҡты үҫтереүгә юнәлгән [illegible] предпринимателдәр һ[illegible] файҙаланыу нигеҙендә, промышленность һәм ауыл хужалығын артабан үҫтереү өсөн тыиын [illegible]

киң мөмкинлектәр тыуҙырырға тейеш.

Германиялағы совет хәрби администрацияһы, билдәле булғанынса, дөйөм Германияла аҡса реформаһын үткәреү кәрәклеген яҡлап, ике төрлө политиканы үткәреүҙе һәм аҡса реформаһын әҙерләүҙе сепаратный, йәшерен рәүештә үткәреүҙе мөмкин түгел, тип иҫәпләне. Шуның һөҙөмтәһендә хәҙерге ваҡытта Германияның совет оккупацион зонаһында баҫылған яңы аҡсалар юҡ. Совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы рейхсмаркалар һәм рентмаркалар нигеҙендә, уларға махсус купондар йәбештереү юлы менән үткәреләсәк.

Аҡса реформаһы уңышлы үтһен өсөн совет оккупацион зонаһында бөтә халыҡ һәм барлыҡ демократик ойошмалар һәм матбуғат билдәләнгән тәртиптәргә ярашлы рәүештә, аҡса реформаһын дөрөҫ үткәрергә, шулай уҡ хужалыҡтың артабан күтәрелешенә һәм экономик ҡыйынлыҡтарҙы еңеп сығыуға, сауҙа әйләнешен киңәйтеүҙә, спекуляция, ҡара базар һәм хаҡтарҙы законһыҙ күтәреү менән көрәшергә булышлыҡ итергә тейештәр.

Немец экономик комиссияһының тәҡдимен һәм немец демократик общественносенең теләктәрен иҫәпкә алып,

ПРИКАЗ БИРӘМ:

1. Германиялағы совет оккупацияһы зонаһының бөтә территорияһында һәм Ҙур Берлин районында 1948 йылдың 24 июненән яңы аҡса: рейхсмаркаларҙың һәм рентмаркаларҙың элекке өлгөләрендә, уларға махсус купондар йәбештереп сығарырға.

Металдан эшләнгән ваҡ аҡсалар әйләнештә, үҙҙәренең номиналь ҡимматендә, ҡалалар.

2. Совет оккупацияһы зонаһында һәм Ҙур Берлин районында махсус купондар йәбештерелгән рейхсмаркалар һәм рентмаркалар, шулай уҡ әйләнештә булған металл аҡсалар түләүҙең берҙән-бер законлы средствоһы булып тора, тип билдәләргә.

3. Германияның совет оккупацион зонаһы ҡарамағында һәм экономик яҡтан совет зонаһы булған Ҙур Берлин районында аҡса әйләнешен [illegible] ҡыйынлыҡтарҙы булдырмау маҡсаттарында, совет оккупацион зонаһының яңы аҡсалары ғына йөрөргә тейеш.

4. Совет оккупацияһы зонаһындағы һәм Ҙур Берлин районындағы бөтә кешеләрҙе, предприятиеләрҙең һәм учреждениеләрҙең етәкселәрен үҙҙәрендә булған бөтә рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы һәм союзный хәрби командование маркаларын яңы аҡсаға — махсус купондар йәбештерелгән элекке өлгөләге рейхсмаркаларға, рентмаркаларға алмаштырыу өсөн 1948 йылдың 28 июненә тиклем кредит учреждениеләренә тапшырырға мәжбүр итергә.

5. Рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы һәм союзный хәрби командование маркаларын яңы аҡсаға — махсус купондар йәбештерелгән рейхсмаркаларға һәм рентмаркаларға алыштырыуҙы 24 июнлә башларға һәм 1948 йылдың 28 июнендә тамамларға.

Рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы һәм союзный командование маркаларын алыштырыуҙы 29 июнда туҡтатырға.

6. Аҡса алмаштырыуҙың тәүге ике көнөндә, йәғни 24 һәм 25 июндә яңы аҡсалар менән бер рәттән иҫке аҡсаларҙы ла — рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы һәм союзный хәрби командование маркаларын, 10 иҫке марканы яңы бер маркаға тиңләү сағыштырмаһында йөрөтөргә һәм бөтә түләүҙәрҙә рөхсәт итергә.

Союзный хәрби командованиенең маркаларын, шулай уҡ махсус купондар йәбештерелмәгән рейхсмаркаларҙы һәм рентмаркаларҙы 26 июндән йөрөтмәҫкә.

7. Немец экономик комиссияһы тарафынан тапшырылған «Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы тураһындағы Положениене» раҫларға һәм немец экономик комиссияһын, шулай уҡ ерҙәр хөкүмәттәрен, магистраттарҙы һәм Берлиндең башҡа идара органдарын рейхсмаркаларҙы, рентмаркаларҙы һәм союзный хәрби командованиенең маркаларын яңы аҡсаға — махсус купондар йәбештерелгән элекке өлгөләге райхсмаркаларға, рентмаркаларға алыштырырға, — шулай уҡ ағымдағы счеттарҙағы вкладтарҙы һәм суммаларҙы 10 иҫке марканы бер яңы маркаға тиңләү сағыштырмаһында, ҡайтанан баһалауҙы үткәрергә мәжбүр итергә. Положениеләге аҡса алыштырыу һәм ҡайтанан баһалау буйынса льготалы һәм айырым шарттарҙа, түбәндәге сағыштырмала алыштырыла:

а) хеҙмәтсәндәрҙең ағымдағы доходтарын һаҡлау маҡсаттарында, һәр бер кешегә 70 маркаға тиклем суммала, бер маркаға бер марка иҫәбендә алыштырыуҙы тәьмин итергә;

б) страховать ителеүселәрҙең хеҙмәт һаҡлыҡтарын һәм уларҙың интерестарын һаҡлау маҡсатында, һаҡлыҡ вкладтарын льготалы баһалауҙа — 100 маркаға тиклем, бер маркаға бер марка, мең маркаға тиклем, биш маркаға — бер марка, һәм страховой полистарҙа ес маркаға — бер марка иҫәбендә алмаштырыуҙы тәьмин итергә;

в) государство, муниципальный һәм башҡа халыҡ предприятиеләренең ағымдағы счеттарында булған суммаларҙы, льгота нигеҙендә, бер маркаға бер марка иҫәбендә ҡайтанан алмаштырырға;

г) башҡа промышленность предприятиеләренең ағымдағы счеттарындағы суммаларҙы аҙналыҡ әйләнеш һәм эш хаҡы өсөн бурыстар күләмендә, бер маркаға бер марка иҫәбендә, ә сауҙа һәм башҡа хужалыҡ ойошмаларының ағымдағы счеттарындағы суммаларҙы бер маркаға бер марка иҫәбендәге льготалы шарттарҙа, хеҙмәт хаҡының аҙналыҡ фонды күләмендә алмаштырырға;

д) ер реформаһы тәртибендә ер бирелгән крәҫтиән хужалыҡтарының артабан ныҡыуына булышлыҡ итеү маҡсатында, был хужалыҡтар алған кредиттарҙы, льготалы шарттарҙа, биш маркаға бер марка иҫәбендә ҡайтанан баһаларға;

е) ағымдағы счеттарҙа һәм вкладтарҙа 1945 йылдың 9 майына тиклем йыйналған һәм хәҙерге ваҡытта блокировать ителгән суммаларҙы 10 маркаға бер марка иҫәбендә ҡайтанан баһаларға; ҡайтанан баһаланған суммаға иҫке заем облигацияларын сығарырға. Бер вкладчиктең ағымдағы счет ҡалдыҡтары йәки вкладтары 3000 марканан артҡан ваҡиғала, ағымдағы счеттың йәки вкладтың хужаһы заем облигацияларын был средстволар накоплениеһенең законлы булыуын тикшергәндән һуң ғына аласаҡ.

Немец экономик комиссияһы был приказды иғлан иткән моменттан алып ес ай эсендә иҫке заемды сығарыу шарттары һәм сроктары тураһында ҡарар ҡабул итергә тейеш;

ж) хәрби поставкалар, спекуляция, базарҙарҙа хаҡты законһыҙ күтәреү һәм ҡара базарҙағы операцияларҙан килгән накоплениеләрҙе юҡҡа сығарыу маҡсатында, бер семьяға 5 мең марканан артыҡ аҡса һәм 5 мең марканан артыҡ күләмдәге ағымдағы счет вкладтарын һәм вкладтар алыштырыуҙы был аҡса суммалары сығанаҡтарының законлылығын тикшергәндән һуң ғына рөхсәт итергә. Шуның менән бергә, һуғышта байыған кешеләрҙең доходтары, спекуляциянан, хаҡтарҙы законһыҙ рәүештә күтәреүҙән һәм ҡара базарҙағы операцияларҙан килгән доходтар законһыҙ тип иҫәпләнәләр һәм уларға конфискация яһалырға тейеш. Шулай уҡ фашистик һәм хәрби енәйәтселәр ҡарамағындағы суммаларға ла конфискация яһалырға тейеш.

Немец экономик комиссияһы, был приказды иғлан иткәндән һуң ике ай эсендә ентекле тикшереү үткәреп һәм законһыҙ килгән доходтарҙы юҡҡа сығарыуҙы тәьмин итеү менән, был аҡса суммалары сығанаҡтарының законлылығын тикшереү тәртибе тураһында инструкция баҫып сығарырға тейеш.

8. Аҡса реформаһы үткәргән ваҡытта бөтә эшселәрҙең һәм хеҙмәткәрҙәрҙең хеҙмәт хаҡын, пенсия һәм стипендияларҙы, шулай уҡ бөтә төр тауарҙарҙың хаҡтарын элекке кимәлдә һаҡлап ҡалдырырға.

9. 1945 йылдың 9 майына тиклем барлыҡҡа килгән Германияның иҫке государство бурыстарына һәм Германияның бөтә тышҡы бурыстарына, шулай уҡ ябыҡ банкыларҙағы бурыс йөкләмәләренә аҡса реформаһы ҡағылмай.

1945 йылдың 9 майына тиклем сығарылған иҫке государство заемдарының облигацияларын алыуҙы һатыу һәм улар буйынса проценттәр түләү тыйыла.

10. Совет Армияһы генералдары һәм офицерҙар составы, совет хәрби администрацияһы сотрудниктәре ҡарамағындағы рейхсмаркалар, рентмаркалар һәм союзный хәрби командование маркаларының немец валютаһы менән алына торған аҡса суммаларын ике аҙналыҡ эш хаҡы күләмендә, ә сержанттар составына — бер айлыҡ хеҙмәт хаҡы күләмендә бер марканы бер маркаға алыштырырға.

Күрһәтелгән кимәлдән артҡан аҡса суммаларының 10 маркаһын бер маркаға алыштырырға.

Был кешеләрҙең һаҡлыҡ һәм ағымдағы счетта булған немец валютаһындағы суммалары юҡҡа сығарыла һәм уларға ҡайтанан хаҡ ҡуйылмай.

11. Аҡса реформаһы үткәреү буйынса булған бөтә эштәргә етәкселек итеү немец экономик комиссияһының главный финансовый управлениеһе тарафынан башҡарыла тип билдәләргә. Был главный финансовый управлениеға раҫланған «Германияның совет оккупацион зонаһында аҡса реформаһы тураһындағы Положениегә» ярашлы рәүештә, ҡулда булған аҡсаларҙы, аҡса билдәләрен алыштырыу, һаҡлыҡ вкладтарына һәм ағымдағы счеттарға ҡайтанан хаҡ ҡуйыу ҡағиҙәләренең аныҡ үтәлешенә яуаплылыҡ йөкмәтелә.

12. Аҡса реформаһы үткәреү менән етәкселекте һәм яуаплылыҡты ерҙәрҙә премьер-министрҙарға, ҡалаларҙа һәм райондарҙа — бургомистрҙарға һәм ландраттарға, ә Ҙур Берлин районында — район бургомистрҙарына һәм ҡала магистратына йөкмәтергә.

Ерҙәр премьер-министрҙарына, ҡалаларҙың һәм райондарҙың бургомистрҙарына һәм ландраттарына аҡса алыштырыу үткәреүгә рөхсәт ителгән кредит учреждениеләренең тәҙмәләрен раҫларға, кредит учреждениеләренә талап ителгән һанда работниктәр бүлеү тураһында, уларҙың талаптарына ярҡлы йөрттәр биреүҙе, аҡса реформаһы үткәргәндә байлыҡтарҙы һаҡлауҙы тәьмин итеүҙе булдырған күрһәтмә бирергә ҡушырға.

13. Иҫке аҡса алыштырыуҙы, счеттарҙы һәм вкладтарҙы ҡайтанан [illegible] номерҙарҙың расчет-эмиссион банкыһы, расчет-эмиссион ер банкылары, ә Берлин ҡалаһында — банкының ҡала конторалы аша үткәрергә.

Һаҡлыҡ кассаларының вкладтарын һәм счеттарын ҡайтанан баһалауҙы 1948 йылдың 30 июненән дә ҡалмай тамамларға.

14. Аҡсалар өсөн махсус купондар яһау, ялған аҡса яһау итеп ҡараласаҡ, һәм был эштә ғәйепләнеүселәр, хәрәкәт итеүсе закондар нигеҙендә, яуапҡа тарттырыласаҡтар.

Германияның совет оккупацион зонаһына һәм Ҙур Берлингә, был приказдың беренсе статьяһында ҡаралғандан башҡа төрлө, икенсе аҡса йөрөшөн индереү, шулай уҡ махсус купондар йәбештерелмәгән рейхсмаркалар һәм рентмаркалар сығарыу, экономиканы өҙөү юлында хәрәкәт итеү итеп ҡараласаҡ, һәм был эштә ғәйепләнеүселәргә ҡарата тейешле саралар күреләсәк.

Германия совет оккупацион зонаһындағы эске эштәр управлениеһе, ерҙәрҙең эске эштәр министрҙәре һәм Берлиндең, уның райондарының полиция начальниктары, был приказдың 14-се статьяһы нигеҙендә, енәйәттәр менән көрәш алып барырға тейештәр.

15. Германияның совет оккупацион зонаһының немец экономик комиссияһының главный финанс управлениеһе, ерҙәр финанс министрҙәре һәм Берлиндең ҡала банк конторалары аҡса алыштырыу һәм счеттарҙы ҡайтанан баһалауҙың барышы тураһында систематик мәғлүмәттәр биреп торорға, һәм шулай уҡ аҡса реформаһын үткәреү йомғаҡтары буйынса тамамлау отчеттары бирергә яуаплылар.

Немец экономик комиссияһын, ерҙәр хөкүмәтен, ҡалаларҙың һәм райондарҙың ландраттарын һәм бургомистрҙарын аҡса әйләнешен ныҡытыу өсөн түбәндәгеләрҙе мәжбүр итергә:

а) йәшәп килгән хаҡтарҙың һаҡланыуы өҫтөнән ҡаты контроль тәьмин итергә һәм ҡара базар, спекуляция менән көрәш буйынса киҫкен саралар күрергә;

б) промышленность тауарҙары эшләп сығарыуҙы киңәйтеү, ауыл хужалығы производствоһын арттырыу һәм халыҡты промышленность тауарҙары һәм азыҡ-түлек менән тәьмин итеү буйынса саралар күрергә;

в) һуғыштан һуңғы ауырлыҡтарҙы күтәреүҙе тигеҙләүҙе, предприятиеләрҙең ағымдағы доходтарына ғәҙел рәүештә һалым һалыуҙы һәм халыҡтың хеҙмәт доходтарын һаҡлауҙы тәьмин итеүсе налог законодательствоһын үҙгәртеү буйынса тәҡдимдәр әҙерләргә;

г) бюджеттен дефицитһеҙ булыуын һәм зонаның хужалығын аяҡҡа баҫтырыуға максималь средстволар һалыуҙы тәьмин итеп, управление эшенә киткән расходты һәм башҡа төрлө кәрәкһеҙ рас[illegible] өсөн саралар күрергә.

17. Был приказдың үтәлеше өҫтөнән контроль эшен Германиялағы совет хәрби администрацияһының финанс управлениеһенә йөкмәтергә.

Совет хәрби администрацияһының баш начальнигы, Германиялағы совет оккупацион ғәскәрҙәре группаһының баш командующиеһы

Советтар Союзы маршалы
В. Соколовский.

Германиялағы совет хәрби администрацияһы штабы начальнигы

Генерал-лейтенант
Г. Лукьянченко.

БЕЛДЕРЕҮ

1948 йылдың 28 июнендә, Ғалимдәр йортонда (Карл Маркс урамы, 6-сы номерле йорт) политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының башҡорт бүлегенең ойоштороу йыйылышы була.

Көн тәртибе:

1. Ойоштороу комитетенең эше тураһында отчет.
2. Обществоның правлениеһен һайлау.
3. Ревизия комиссияһын һайлау.

Йыйылышҡа действительный члендар, члендәр-соревнователдәр, действительный члендәрҙән-коллективтарҙан һәм общественный ойошмаларҙан вәкилдәр саҡырылалар.

Саҡырыу билеттарен обществоның ойоштороу комитетенән (Ғалимдәр йортонда, Карл Маркс урамы, 6-сы номерле йорт) алырға мөмкин. **Ойоштороу комитеты.**

Баш врачтар, медицина участкаларының мөдирҙәре, Башҡорт АССР-ындағы һаулыҡ һаҡлау учреждениеләре иғтибарына.

Башҡорт АССР-ы аптекалар управлениеһе һайлап алыу өсөн, ҙур күләмдә, медицина йыһаздары, хирургия инструменттары, ауырыуҙар өсөн тәьминәт әйберҙәре һәм түбәндәге һәр төрлө дарыуҙарҙы алырға мөмкинлекте белдерә. Мәҫәлән, кешегә ҡан ебәреү өсөн ампулалар, микроскоптары менән клинико-диагностик лабораториялар, стационар һәм портатив Бах лампалары, солюкс, стационар һәм портатив инфраруж, стационар һәм портатив диатермиялар бар.

Шулай уҡ гальваник таҡталар, эналаре менән һәр төрлө шприцтәр, эмалле Эсмарх кружкалары, рентген аппараттары, электр менән эшләй торған шлейф машиналары, йәрәхәт бәйләү өсөн комплектле материаллар, медицина ойоҡтары, анатомик перчаткалар, пневматоракс аппараттары, электрик стерилизаторҙар, спирт лампалары, акушерҙар сумкаһы, Беллер шиндары, Бюркер камералары реласкоптар, хирургия перчаткалары, һәр төрлө пинцеттәр, һәр төрлө ҡайсылар, уреоскоптар, Юдин өҫтәлдәре УВЧ аппараттары, резина трубкалар, сәс алыу өсөн машинкалар, яһалма күҙҙәр, операция өсөн бәләкәй күләмдәге приборҙар комплекты, Гегар приборҙары, бала[illegible] клеенкалары, кислород мендәрҙәре. Рива-Роччи аппараттары, тонометрҙар, индивидуаль пакеттәр, спирометрҙар, һәр төрлө [illegible] кризанолдар, мафе[illegible]сен, инсулин, пенготал, лимон әсеһе, новоарсенол, соварсен, солициловый натр, уротропин, солицин кислотаһы, [illegible] кислотаһы, протаргол, азотлы көмөш әсеһе, [illegible], фенацетин, люминал, [illegible] кофеин, диеульфан, бромлы натр, веронал, висмут, стрептоцид, спермин, [illegible], метрозол, прокаин, [illegible] сол, сальсалин, биохинол, [illegible] моверол, эт муйылы һәм [illegible] тырнағы экстракттары, балыҡ майы, һәр төрлө дарыу [illegible] йыҡсалары һәм шундай башҡа төрлө препараттар.

Заказдарҙы һәм һорауҙарҙы урындағы район һәм участка аптекалары аша Башаптека управлениеһенә тәьминәт бирергә ебәрергә.

Быһың өсөн адрес: Өфө ҡалаһы, Октябрь революцияһы урамы, йорт номеры 8.

Телефондар: 2—92—50, 2—74—49.

ГАПУ-ҙың Башҡортостан бүлеге.

Вүҙәк районы «Сулпан» [illegible]ның ҡошсолоҡ фермаһы [illegible] дан-йыл киңәйә бара. Быйыл[illegible] кубатор станцияһынан 400 [illegible] алып, уларҙы ферманың [illegible] ҡошсоһо Гәрифә Аслаева [illegible] үҫтерә.

Һүрәттә: Ғ. Аслаева [illegible] араһында.

Ф. Ғәлиев фото[illegible]

Грамотаһыҙлыҡты бөтөрөү өсөн

ДҮРТӨЙЛӨ. ВКП(б) ра[illegible] митете һәм район мәғариф [illegible] ике йыл эсендә район буй[illegible] грамотаһыҙлыҡты һәм аҙ бе[illegible] лелекте бөтөрөргә, тигән [illegible] ҡабул иткәйнеләр. Иҫәпла[illegible] дың һуңында, 1947—1948 [illegible] йылы башына районда 289 гр[illegible] таһыҙ һәм 972 аҙ белемле [illegible] барлығы билдәләнде.

Бөтә мәктәптәрҙә лә кисе[illegible] тар эшләй башланы. Уларҙ[illegible] тыуҙа 259 уҡытыусы һәм [illegible] ра-ағартыу работниктары [illegible] ты. Бигерәк тә, был [illegible] Әнгәсәк сте [illegible] тыусыһы Куликов, Яңы [illegible] йыллыҡ мәктәбе уҡытыу[illegible] симов, Яңы Ҡаңлыш [illegible] Мәсәғутова, Шәрипова һәм [illegible] иптәштәр яҡшы эшләнеләр. [illegible] һәр ваҡыт план буйынса [illegible] төрлө ҡыҙыҡлы дәрестәр [illegible] торҙолар, уҡыусыларҙы [illegible] политика мәсьәләләре, [illegible] художестволы әҙәбиәт [illegible]

Уҡыу йылы тамамланғ[illegible] йомтәлә, район буйынса 24[illegible] грамотаһыҙҙар курсын һә[illegible] ше аҙ белемлелә[illegible] ланы.

Киләһе уҡыу йылында [illegible] һыҙлыҡты һәм аҙ белем[illegible] бөтөнләйгә бөтөрөү [illegible] йылы.

П. М[illegible]

Крахмал заводы

ШАРАН. Ағымдағы йылда [illegible] ләк» колхозында крахмал [illegible] һалынасаҡ.

Хәҙер төҙөлөш өсөн [illegible] ағас әҙерләү эштәре [illegible] Был эшкә 80 кеше, 20 ат [illegible] рылды.

Ошо йылдың беренсе [illegible] завод эксплоатацияға т[illegible] саҡ һәм тәүлегенә [illegible] крахмал эшләп сығарасаҡ.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗА[illegible]

Редакция адресе: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙары: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

П00192 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 1[illegible]

БӨТӘ ИЛДӘРЗЕҢ ПРОЛЕТАРИЙЗӘРЕ, БЕРЛӘШЕГЕҘ!

ҠЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

23-сө йыл сыға

1948 йыл
№ 127
27
июнь
йәкшәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Н. Н. Шверникка Ленин ордене тапшырыу. (1-се бит).

В. М. Молотов Мәскәүгә ҡайтты. (1-се бит).

Бөтә ауыл хужалығы эштәрен нык ойошҡанлыҡ менән алып барырға! (1-се бит).

Советтәр Союзында. (1-се бит).

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитеты Пленумы. Партия ойошмаларында пропаганда һәм агитация эшенә торошо һәм уларҙы яҡшыртыу саралары тураһында иптәш Шафиков докладына буйынса фекер алышыуҙар. (2-се бит).

МАТБУҒАТ КҮҘӘТЕҮ. Газетаға кемдәр яҙышалар? (2-се бит).

Беҙгә күп төрлө һәм яҡшы шағирҙар кәрәк. (3-сө бит).

Баязит Бикбай. Яҡы тауыштар. (3-сө бит).

Беҙҙең республикала. (4-се бит).

ФЕЛЬЕТОН. Маһилов алымы менән. (4-се бит).

Чигез государстволар Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһендә ҡабул ителгән белдереүгә сит ил матбуғатының откликтәре. (4-се бит).

Партия ойошмаларында пропаганда һәм агитация эшен яңы бейеклеккә күтәрергә

Хеҙмәтсәндәрҙе коммунистик рухта тәрбиәләү, бөтә халыҡты биш йыллыҡты дүрт йылда үтәү өсөн көрәшкә мобилизовать итеү бурысы партия ойошмаларынан халыҡ араһында массовый-политик эште, пропаганда һәм агитация эшен артабан яҡшыртыуҙы талап итә. Шуның өсөн дә республикабыҙҙа партияның район, ҡала һәм өлкә конференцияларында партия ойошмаларының пропаганда һәм агитация эшендә булған сирҙәре етешһеҙлектәре ҡискен тәнҡитләнде һәм агитация-пропаганда эшен яҡшыртыу буйынса конкрет талаптар ҡуйылды.

Конференциялардан һуң ВКП(б) район һәм ҡала комитеттәре партия пропагандаһының яҡшыртыуҙа, коммунисттарҙың идея-политик кимәлен күтәреүҙә байтаҡ эштәр башҡарҙылар. Быйыл партия уҡыуҙары бер йыл сифат яғынан күренекле яҡшырҙы. Республикала 687 политик мәктәп эш ...

Халыҡ араһында агитацион-массовый эш алып барыуҙа ла ҙур эштәр башҡарылды. ...

Ләкин партия ойошмаларының пропаганда һәм агитацион-массовый эшендә етешһеҙлектәр бар әле. ...

Марксизм-ленинизмды үҙ аллы өйрәнеүселәр менән эшләү бигерәк тә насар тора. ...

ВКП(б) райкомдарының секретарҙәре, пропагандистәре үҙ аллы ...

... на уҡыусы коммунистар менән беседалар үткәрмәйҙәр, консультациялар бик һирәк була, ә район тарихтәнән лекциялар бик аҙ райондарҙа ғына бер генә үткәрелдәр.

Был етешһеҙлектәр шунан килеп сыға, сөнки күп райкомдары пропаганда эше менән конкрет етәкселек итмәйҙәр, ВКП(б) Үҙәк Комитетенең «Бөтә коммунистарҙы лә политик уҡыуға йәлеп итергә, уҙар уҡыуын идея-политик кимәлдәрен нисек күтәрелергә икәнлеген асылда тикшерергә тура килгән» тигән күрһәтмәһен үтәмәйҙәр. ...

Төрлө партия ойошмалары һәр бер коммунисттың уҡыуы тураһында конкрет шөғелләнергә бурыслылар. ...

Республикала партия уҡыуҙарын яҡшыртыу өсөн партия ойошмаларының пропаганда эшенә конкрет етәкселек итеүҙәренә ... партия ойошмаларының иң мөһим эше булырға тейеш.

Пропаганда эшен тағы ла юғары кимәлгә күтәреү менән бер рәттән халыҡ араһында массовый-политик эште лә көсәйтергә кәрәк. ...

Өшө кендәрҙә ВКП(б) Өлкә Комитетының пленумы өлкә партия ойошмаларында пропаганда һәм агитация эшенең торошон һәм уны яҡшыртыу саралары тикшерҙе һәм конкрет ҡарар ҡабул итте. Башҡортостан партия ойошмаларының бурысы — был ҡарарҙы ... тормошҡа ашырыуҙан, пропаганда һәм агитация эшен яҡшыртыудан тора.

В. М. Молотов Мәскәүгә ҡайтты

25 июндә СССР Сит ил Эштәре министре В. М. Молотов, Варшавала ҡалаһында үткәрелгән ... государстволары Сит ил Эштәре министрҙәре кәңәшмәһенән, Мәскәүгә ҡайтты. (ТАСС).

Бәләбәй педагогия училищеһының Преподавателе иптәш А. М. Раҡшаны Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамотаһы менән наградлау тураһында

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Указы

Бәләбәй педагогия училищеһының преподавателе — Башҡорт АССР-ы мактаулы уҡытыусыһы иптәш Афанасий Максимович Раҡшаны, педагогия эшмәкәрлегендә 50 йыл тулыу айҡанлы, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумының Почет грамотаһы менән наградларға.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Председателе Ғ. НИҒМӘТЖАНОВ.

Башҡорт АССР-ы Верховный Советы Президиумы Секретары Э. БИКТИМЕРОВ.

Өфө, 25 июнь, 1948 йыл.

СССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш Н. М. Шверникка Ленин ордене тапшырыу

Кисә, 24 июндә, Кремлдә СССР Верховный Советы Президиумы Председателенең Урынбаҫары һәм РСФСР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш **И. А. Власов** СССР Верховный Советы Президиумы Председателе иптәш **Н. М. Шверникка** тыуыуына 60 йәш тулыу айҡанлы партия һәм совет халҡы алдында күренекле хеҙмәте өсөн наградланған **Ленин** орденен тапшырҙы. (ТАСС).

БАССР Министрҙәр Советында һәм ВКП(б) Өлкә Комитетында

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә республика Почет кнәгәһе булдырыу тураһында

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә ҡатнашлыҡ итеүсе социалистик ярыш еңеүселәрен дәртләндереү өсөн БАССР Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты бюроһы **ҡарар иттеләр:**

Ишембай — Ермолаевка тимер юлын төҙөүҙә республика Почет кнәгәһен булдырырға.

Почет кнәгәһенә Министрҙәр Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең ҡарары менән тимер юл төҙөлөшөндә ҡатнашыусы айырыуса еңеүҙәргә өлгәшкән участка, район һәм колхоз буйынса бирелгән күләм заданиеләрен срогынан алда үтәүҙә ... партия ойошмаларының, шулай уҡ общественный ойошмаларҙың етәкселәре индереләләр, тип билдәләргә.

Почет кнәгәһенә индереү өсөн кандидатуралар төҙөү участкалары етәкселәре тарафынан, урындағы ВКП(б)-ның район комитеттәре секретарҙәре һәм район Советы башҡарма комитеттәренең председателдәре менән берлектә, Министрҙәр Советына һәм ВКП(б) Өлкә Комитетына тапшырыла.

Почет кнәгәһе төҙөлөш осоронда Төҙөлөш Управлениеһе начальнигендә була, тип билдәләргә.

Район газеталары редакторҙарын Почет кнәгәһенә индерелгән кешеләрҙең һәм ойошмаларҙың исемлеген газетала баҫып сығарырға мәжбүр итергә.

БӨТӘ АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫ ЭШТӘРЕН НЫК ОЙОШҠАНЛЫҠ МЕНӘН АЛЫП БАРЫРҒА!

Ярышып эшләйҙәр

Туймазы районы «Өсән тамаҡ» колхозы звеноларҙы сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙартыуҙа ярышып эшләйҙәр. Улар 150 гектар сәсеүлекте яҡшы итеп утаһылар. Утауҙа көн һайын 75 кеше ҡатнаша. Социалистик ярышта Танфә Ғазиева, Мәлика Ғабдуллина, Хәлимә Ҡәлимуллина иптәштәр алда баралар. Улар көн һайын 0,5—0,6 гектар майҙанда сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәренән таҙарталар.

И. Маев.

Малдарға аҙыҡ әҙерләнә

Янаул районы «Искра» колхозында общественный малдарҙы тәрбиәләү өлгәлә ҡуйылған. Ферма (мөдире иптәш М. Мерзляков) работниктәре үҙҙәренә беркетелгән малдарҙы ҙур хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр.

Йылҡы фермаһы алдынғыларынан Я. Елокин быйыл үҙенә беркетелгән 6 бейәнән 6 ҡолон, Н. Зайцев 4 бейәнән 4 ҡолон, Мерзлякова 3 бейәнән 3 ҡолон алды. Бөтәһе 50 баш бейәнән 46 ҡолон алынды.

Колхозда башҡа төр малдар буйынса йыллыҡ план арттырылып үтәлде.

Колхоз хәҙер общественный малдарға ныҡлы аҙыҡ базаһы булдырыу өсөн көрәшә. 200 тонна силос һалына, байтаҡ майҙанда болон һәм сәселгән үләндәр сабыла.

М. Фәтихов.

Яуапһыҙлыҡ һөҙөмтәләре

«Завет Ильича» колхозында молотилкаларҙың береһе баҫыуҙа, ә икенсеһе һарайҙа ватылып ята. Тимерлеккә килтерелгән урғыстар ҙа ремонтланмай ултыралар.

Ҡариҙел районының башҡа колхоздарында ла шундай уҡ күренеш. «Марс», «Айрат», «Капаш» һәм Чапаев исемендәге колхоздарҙа урғыстар һәм молотилкалар ремонтланып бөтмәгән.

Урожай йыйнауға әҙерлекте ойоштормау һөҙөмтәһендә районда 41 урғыстың тик 5-һе, ә 51 молотилканың тик 15-е генә ремонтланған.

Районда урожай йыйнауға әҙерлектә ябай машиналар ғына түгел, хатта ҡатмарлы машиналар, комбайндар ҙа ремонтланмайҙар. Ҡариҙел МТС-ында 11 «Сталинец» комбайнының береһе лә әҙер түгел. Ә шулай булыуға ҡарамаҫтан, МТС етәкселәре «5 комбайн ремонтланды» тип Ауыл хужалығы Министерствоһына сводка биргәндәр.

МТМ мөдире иптәш В. Шадрин ремонтсыларға ярҙам күрһәтеү урынына, үҙе уҡ уларға тотҡарлыҡ яһай. Мәҫәлән, комбайнер иптәш Борисов бер болт яһап алыу өсөн уға биш көн буйына мөрәжәғәт итте, ләкин Шадрин конкрет яуап бирмәне. Ә алтынсы көндә:

— Дирекциянан приказың бармы һуң?—тип һораны. Тимәк, уның фекеренсә, болт йәки гайка кәрәк булған һайын, уға тик приказ буйынса ғына мөрәжәғәт итергә кәрәк. Ә МТС директоры Меркулов һәм уның политик эш буйынса урынбаҫары Грачев иптәштәр ремонтсылар араһында булмайҙар, эштең торошо менән ҡыҙыҡһынмайҙар.

МТС-та шулай уҡ механизатор кадрҙар әҙерләүгә лә иғтибар юҡ. 3 комбайнер һәм 10 штурвалсы етешмәй.

Ғ. Исмәғилов,
(Үҙ хәбәрсебеҙ).

Баҫыуҙы ҡый үләндәре баҫҡан

Маҡар районы Сталин исемендәге колхозда 12 көндә ни бары 120 гектар бойҙай уталды. Ә 450 гектар сәсеүлеккә әле бөтөнләй ҡул теймәгән. Баҫыуҙарҙа сәсеүлектәрҙе ҡый үләндәре баҫалар. Утауға көн һайын 188 кешене сығарырға мөмкин булыуға ҡарамаҫтан, тик 65—70 кеше генә ҡатнаша.

Колхоз етәкселәре звеноларға иғтибар итмәйҙәр. Ҡыш көнө колхозда 10 звено ойошторолғайны, ләкин уларҙың орлоҡсолоҡ звеноһынан башҡалары таралып бөттөләр. Шуның һөҙөмтәһендә эш таршау бара. Бында утауға көндөҙгө сәғәт 11-ҙә сығалар, 3-тә ҡайталар.

Колхоз ҙур. Партия һәм комсомол ойошмалары ла бар. Ләкин улар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләүҙе ойоштороуға иғтибар итмәйҙәр.

С. Сәйфуллин.

Ремонт планы өҙөлә

Салауат районының Малаяз һәм Арҡауыл МТС-тарында (директорҙары Әминев һәм Абдуллин иптәштәр) комбайндарҙы ремонтлай башлауға инде һигеҙенсе ай. Ләкин ремонт эшенең насар ойошторолоуы арҡаһында 45 комбайндың тик 15-е генә ремонттан сыҡты.

Малаяз МТС-ында һуңғы биш көнләктә 4 комбайн ремонтланырға тейеш ине, ләкин бер генә комбайн да ремонтланманы.

Ремонтта ни бары 18 кеше ҡатнаша, ә 12 комбайнерҙен быйыл МТС-ҡа килгәне лә юҡ. Комбайнерҙарҙың ремонтҡа ылыҡтырылып бөтмәүендә колхоз председателдәре лә ғәйепле. «Путь социализма» колхозының председателе иптәш Сәетғалин:

— Ваҡыт бар, ашлыҡ өлгөрмәгән бит әле, — тип яуап бирә. Комбайнерҙарҙы МТС-ҡа ебәреүҙе тотоп тора. «Партизан», «Башташ», «Ким», «Үрге Үҙән» колхоздарының председателдәре лә урожай йыйнау ваҡытының килеп етеүен көтәләр.

МТС-та ремонтсыларға эш шарттары тыуҙырылмаған. Дейәм торлаҡ юҡ. Улар көн һайын 5—8 километр алыҫлыҡтағы ауылдарҙан йөрөп эшләйҙәр. Эшләү өсөн көнөнә 3—4 сәғәт кенә ваҡыт ҡала. Дейәм туҡланыу әле булһа булдырылмаған.

Ремонтсылар араһында социалистик ярыш ойошторолмай. Стена газетаһы, «боевой листоктар» сығарыу тураһында уйлаған кеше лә юҡ.

Арҡауыл МТС-ында ла шундай уҡ етешһеҙлектәр күп. Бында 15 комбайнер урынына 7 комбайнер генә ремонтта ҡатнаша. Хеҙмәт дисциплинаһы түбән. Бер генә ремонтсы ла көнләлек норманы үтәмәй. Бында ни бары 5 комбайн ремонтланды. Былтыр Гулаков исемендәге колхоздың баҫыуында ҡалдырылған ике комбайн әле булһа МТС усадьбаһына илтерелмәгән. Уларҙың күп частары юғалған.

Район МТС-тарында комбайндарҙы ремонтлау темпы ошо сарын менән дауам итһә, ремонтты тамамлау өсөн яҡынан 16 ай ваҡыт кәрәк буласаҡ.

З. Валиев.

СОВЕТТӘР СОЮЗЫНДА

Художник В. Корецкийҙең «Искусство» издательствоһы тарафынан баҫып сығарылған хеҙмәте.
ТАСС фотохроникаһы.

Артелдәр инициативаһы

Украинаның арбалар эшләй торған промартелдәре машина-трактор станциялары өсөн нефть ташыу арбалары эшләп сығара башланылар. Һәр бер арбаға 250 литр һыйышлы ике тимер миска, насостар һәм шлангылар урынлаштырылған. Бынан башҡа ул май һалыу өсөн бидондар, инвентарь һәм инструменттар өсөн йәшниктәр менән тәьмин ителгән. Быйыл Украина МТС-тары өсөн бындай 3 мең арба эшләнәсәк.

Ҡағыҙҙан киң ҡулланыу изделиеләре эшләү

СССР-ҙың целлюлоз һәм ҡағыҙ промышленносе Министерствоһы предприятиеләре ҡағыҙҙан яңы изделиеләр эшләп сығарыуҙы үҙләштерҙеләр.

Кондровский фабрикаһы (Калуга өлкәһе) 12 төрлө төҫтә әҙерләнгән декаратив ҡағыҙҙың тәүге партияларын эшләп сығарҙы. Был йөҫкә, матур итеп эшләнгән ҡағыҙ абажурҙар, яһалма сәскәләр эшләү өсөн файҙаланыла.

Пензалағы «Маяк» фабрикаһы ҡағыҙҙан аҡ һәм төрлө төҫтә аннъяулыҡтар эшләп сығара башланы. Улар ныҡ итеп һәм матур биҙәктәр төшөрөп эшләнгәндәр.

(ТАСС).

Яңы игенде эшкәртеү

Баку тирмәндәрендә яңы урожай игенен тартыу башланды. Тирмәндәрҙә яңы оборудованиеләр: вальцовка станоктары, махсус иләктәр, иген бушатыу һәм он төйәү өсөн механизмдәр урынлаштырылған. Былар бөтәһе лә тәүлегенә 100 тоннанан артыҡ иген эшкәртергә мөмкинлек бирә.

ГИДРОТУРБИНДӘР

Таллиндең «Терас» артеле, ауыл электр станциялары өсөн, 275 ат көслө гидротурбиндәр эшләп сығара башланы. Беренсе 19 гидротурбин эшләнде лә инде. Йыл аҙағына тиклем тағы ла бер нисә тиҫтә гидротурбин эшләп сығарыласаҡ.

Сәй фабрикаһы

ТБИЛИСИ. (ТАСС). Очемчир районында (Абхазия). Сәй фабрикаһы төҙөлә. Фабрика сезонда йөҙәр меңләгән килограмм сәй япраҡтарын эшкәртәсәк.

Тиҙ көндәрҙә, төҙөлөштә эшләй торған механизмдарҙы энергия менән тәьмин итеүсе, ваҡытлы электро станцияһы эшләй башлаясаҡ. Эшселәр, инженер-техник работниктәр өсөн торлаҡ йорттар һалына.

Был төҙөлөш, план буйынса, алдағы йылдың башында тамамланырға тейеш.



СТАЛИНГРАД. «Красный Октябрь» заводының, Сталинград оборонаһының беренсе көндәре геройының, корос ҡойоусы Ольга Ковалева эшләгән 12-се номерлы мартен мейесе аяҡҡа баҫтырылды. Краснооктябрьселәр был мейесте уның исеме менән атанылар. Ольга Ковалева мейесе май айында беренсе продукция бирҙе.

Һүрәттә: 1-се номерлы мартен цехының дейәм күренеше. Һулдан беренсе 1-се номерлы мейес.

А. ... фотоһы.
(ТАСС фотохроникаһы).

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитете Пленумы

Партия ойошмаларында пропаганда һәм агитация эштәренең торошо һәм уларҙы яҡшыртыу саралары тураһында иптәш Шафиков докладын буйынса фекер алышыуҙар

Өлкә партия ойошмаһында пропаганда һәм агитация эштәренең торошо һәм уларҙы яҡшыртыу саралары тураһында иптәш Шафиковтың докладын буйынса фекер алышыуҙар булды. ВКП(б)-ның Өфө ҡала комитете секретаре иптәш Фокин беренсе булып сығыш яһаны.

— 1948 йылдың февраль-мартында булып үткән район, ҡала һәм өлкә конференциялары, — ти иптәш Фокин, — идеологик, пропаганда һәм агитацион-массовый эштәр өлкәһендә байтаҡ серьез [illegible]еҙлектәрҙе астылар. ВКП(б)-[illegible] ҡала комитете һәм район ко[illegible]тәре конференция ҡарарҙа[illegible]тә барып, күпселек партия [illegible]ларының иғтибарын идео[illegible] эше мәсьәләләренә юнәлт[illegible] һәм уны бер ни тикләм яҡ[illegible]тыуға өлгәштеләр. Уның бө[illegible]һе, бөтәһенән дә элек, ком[illegible]истарҙың политик уҡыуҙары [illegible]нең яҡшырыуында күренде: ВКП(б) члендәрен һәм кандидаттарын марксистик-ленинсе уҡыуҙарға ылыҡтырыу һәм уҡыуҙың сифаты артты. Әгәр ҙә ҡала партия конференцияһына тикләм төрлө формалары партия уҡыуҙарына ҡала партия ойошмалары составындағы коммунистарҙың 85 проценты ылыҡтырылған булһа, хәҙер ВКП(б) члендәренең һәм кандидаттарының 95 проценты уҡый.

Иптәш Фокин, коммунистарҙың партия уҡыуҙарын көсәйтеү буйынса ҡала комитете һәм район комитеттәре тарафынан күрелгән саралар тураһында тулы рәүештә һөйләп, был өлкәләге серьез етешһеҙлектәргә туҡталды.

— Пропаганда эштәрендәге был етешһеҙлектәр, — тине ул, — нигеҙҙә түбәндәгеләргә ҡайтып ҡалалар:

Беренсенән, идеология эше ошо көнгә тикләм бөтә партия ойошмаларының иғтибар үҙәгендә тормай, ВКП(б)-ның ҡала комитете һәм район комитеттәре тарафынан һәр бер партия ойошмаһында идеология эшенә конкрет һәм оператив етәкселек тәьмин ителмәй.

Икенсенән, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ВКП(б)-ның ҡала комитете һәм район комитеттәре идеологик эште айырыуса пропаганда эшенә, тик пропаганда һәм агитация бүлектәренең тейә эш участкаһы тип ҡарайҙар; шуның партия аппараттары был мәсьәләләргә йәҙ менән әйләнмәнәләр әле һәм уның менән [illegible] шөғөлләнмәйҙәр. Етәксе работниктар үҙҙәре — ҡала комитете һәм район комитеттәре секретарҙәре, бүлек мөдирҙәре түңәрәктәр һәм политик мәктәптәр менән етәкселек итмәйҙәр.

Өсөнсөнән, партия комитеттәре (ВКП(б)-ның Жданов һәм Ленин район комитеттәре) идеология мәсьәләләрен пропаганда һәм агитация бүлектәренә ышанып тапшырҙылар ҙа, был бүлектәрҙе нығытыу тураһында, уларҙың ойоштороусылыҡ ролдәрен күтәреү тураһында ысын хәстәрлек күрмәйҙәр.

Дүртенсенән, ВКП(б)-ның ҡала комитетенең һәм район комитеттәренең пропаганда һәм агитация бүлектәре тәүге партия ойошмалары менән йомшаҡ бәйләнеш тоталар һәм уларға кәрәкле ярҙамды күрһәтмәйҙәр. Пропаганда һәм агитация бүлектәренең күп кенә работниктәре үҙҙәрен ойоштороусылар итеп ҡарамай башлайлар һәм йыш ҡына пропаганда эше буйынса билдәләнгән саралар ойоштороу эше менән нығытылмайҙар.

Бынан ары иптәш Фокин ҡала интеллигенцияһы араһында идея-политик эштәрҙең торошо һәм уны көсәйтеү буйынса билдәләнгән саралар тураһында һөйләй.

— Политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының Башҡортостан бүлеген ойоштороу, — ти иптәш Изгин, — беҙҙең республикабыҙҙың культура, политик тормошонда ҙур ваҡиға булып тора. Обществоның эшмәкәрлеге хеҙмәтсәндәрҙең культураһын күтәреүҙә, кешеләрҙең аңдарындағы капитализм ҡалдыҡтарын бөтөреү өсөн көрәштә ярҙам итәсәк.

Общество ҡала һәм ауыл хеҙмәтсәндәре массаларына Маркстың, Энгельстең, Лениндең, Сталиндең идеяларын аңлатыу өсөн, алдынғы совет фәненең яңы өлгәшеүҙәрен аңлатыу өсөн, беҙҙең бөтә халҡыбыҙҙы марксистик-ленинсе материализм күҙлегенән донъяға ҡарау рухында тәрбиәләүгә ярҙам итеү өсөн саҡырылған.

Обществоның айырым действительный члендәре социаль-экономик, тәбиғәт, техник фәндәренең актуаль мәсьәләләре буйынса темаларҙы эшләүгә актив эшкә тотондолар. Бөгөнгә көнгә тикләм 60-тан артыҡ тема эшләнде, шуның 30-ы обществоның 1948 йылдың июнь-август айҙары өсөн төҙөлгән тематик эш планына индерелде. Халыҡ-ара хәлдәр тураһында һәм башҡа темаларға байтаҡ лекциялар уҡылды инде.

Бөтә Союз обществоһы правлениеһе яҡын көндәрҙә Өфөгә, шулай уҡ республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында һәм райондарында публичный лекциялар уҡыу өсөн беҙгә Мәскәүҙән обществоның действительный члендәре булған күренекле ғалимдарҙы, яҙыусыларҙы ебәрәсәк. Обществоның эшмәкәрлеге райондарға, предприятиеләргә, колхоздарға тикләм барып етергә тейеш.

Шулай ҙа, ВКП(б)-ның район комитеттәренең һәм ҡала комитеттәренең хәстәрлеге һәм ярҙамдары булмай тороп, ҡала һәм ауылдарҙың бөтә халыҡтары араһында политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса обществоның эшмәкәрлеген йәйелдереп ебәреү мөмкин түгел. Фәнни-ағартыу эштәрен көсәйтеү тураһында ВКП(б) Үҙәк Комитетенең күрһәтмәһе булыуға ҡарамаҫтан, партия ойошмалары ошо көнгә тикләм бөтә халыҡты уға тулыһынса ылыҡтырыуға өлгәшә алмайылар әле. Миҫалға Өфөнө алайыҡ. Бында политик һәм фәнни-ағартыу эше, ҡала ситтәрендә: Иҫке Өфө, Нижегородка, Глумилино, Кооператив Полянаһында йәшәүсе эшселәр араһында пропаганда эше бөтөнләй ҡайғыртылмаҫлыҡ алып барыла. Кооператив Полянаһында йәшәүселәр, беҙҙә күп йылдарҙан бирле лекциялар, докладтар булғаны юҡ, тип бик хаҡлы һөйләйҙәр.

ВКП(б) район комитеттәренең пропаганда һәм агитация бүлектәренең бик күп ауыл райондарындағы эшмәкәрлеге совет һәм партия активенең бик тар түңәрәген ылыҡтырыу менән сикләнә. Колхоз крәҫтиәндәренең киң массалары өсөн лекциялар, докладтар сирәк ойошторола. Политик һәм фәнни белемдәрҙе пропагандалауға ауыл интеллигенцияһы бик йомшаҡ ылыҡтырыла.

Яңы обществоның эшмәкәрлеген киң йәйелдереп ебәреү партия, совет органдарына киң халыҡ массалары араһында фәнни-ағартыу эшен пропагандалауҙы яҡшыртыуға ярҙам итер. Шулай ҙа, тәнҡитләү тәртибендә шуны ла әйтеп үтергә кәрәк: фәнни көстәр, интеллигенция, инженер-техник персоналдар туплаған республика үҙәгендәге учреждениеләр, вуздар, ғилми-тикшеренеү институттары, эре предприятиеләр обществоға үҙҙәре һаман да член итеп оформить итмәйҙәр. Мин, бөтәһенән дә элек, бында һаулыҡ һаҡлау һәм ауыл хужалығы Министерстволарын, ауыл хужалығы институтын, авиация институтын һәм башҡаларҙы күҙҙә тотам.

Партия һәм совет органдары действительный члендәрҙе һәм киң халыҡ массалары өсөн лекциялар ойоштороу буйынса ярышыусы члендәрҙе ылыҡтырыу буйынса обществоның эшмәкәрлеген йәйелдереүҙә актив ярҙам итергә тейештәр.

ВКП(б)-ның Стәрлетамаҡ ҡала комитете секретаре иптәш Мырзаханов үҙ сығышының башында коммунистарҙың уҡыуҙарын юлға һалыу буйынса үткәрелә барған саралар тураһында һөйләне, ә унан һуң интеллигенция, ойошмаған халыҡтар, предприятиеләрҙәге эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр араһында массовый-политик эштәрҙең торошона туҡталды.

— Массовый-политик эштә серьез етешһеҙлек булып, — ти иптәш Мырзаханов, — беҙҙә уның кампаниясы үткәрелеүе тора. Бынан ҡотолоу өсөн беҙ һәр бер унар йорт буйынса политик эштәрҙе юлға һалыуға тотондоҡ. Һәр бер тәүге партия ойошмаһына айырым участка бирелгән һәм ул уларға үҙенең агитаторҙарын беркетә. Хәҙер халыҡ араһында массовый-политик эш көсәйә.

Беҙҙә эшселәрҙең йыйылыштарын үткәреү эше насар тора ине. Был мәсьәләне беҙ ҡала комитете бюроһы ултырышында тикшерҙек һәм «Эшселәр йыйылышын йыйнауға әҙерләү һәм уны үткәреү практикаһы тураһында» ҡарар ҡабул иттек. Шунан һуң беҙ, эшселәрҙең йыйылыштарын үткәреүҙә, унда етәксе работниктарҙың политик докладтар яһауын ВКП(б) ҡала комитетенең пропаганда һәм агитация бүлегенең эш планына индерә башланыҡ. Бынан башҡа, бөтә бюро члендәренә һәм ҡала комитетенең ҡайһы бер члендәренә ҡала хеҙмәтсәндәре алдында докладтар менән сығыш яһау эшен тапшырабыҙ. Шундай юлдар менән беҙ был өлкәләге эштәрҙе лә байтаҡ юлға һалдыҡ.

Бөтә партия-политик һәм массовый-аңлатыу эштәре хеҙмәтсәндәрҙе туплау, сталинсе биш йыллыҡтың өсөнсө хәл иткес йылы планын ваҡытынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты киң йәйелдереү интерестарына буйһондорылған.

ВКП(б) Өлкә Комитетенең ойоштороу-инструкторлыҡ бүлеге мөдире иптәш Ҡорбанголов үҙ сығышын тәүге партия ойошмалары секретарҙәрен тәрбиәләүҙе һәм инструкторлауҙы көсәйтеү, инструктор кадрҙәрҙың политик әҙерлек кимәлдәрен күтәреү, ВКП(б) район комитеттәренең пленумдарын регуляр рәүештә үткәреү мәсьәләләренә арнаны.

— Йәштәр араһында политик-тәрбиә эше, — тине ВЛКСМ-дың Өлкә Комитете секретаре иптәш Саяпов, — ВКП(б) Үҙәк Комитете тарафынан беҙҙең алдыбыҙға ҡуйылған талаптарға яуап бирә алмайҙар әле, тип әйтергә кәрәк. Беҙҙең республикабыҙҙа бер миллион самаһы егеттәр һәм ҡыҙҙар бар. Тик мәктәптәрҙәге уҡыусылар ғына 600 мең кеше, вуздар һәм техникумдарҙың студенттәре — 18 мең кеше. Былар, донъяға ҡараштары яңы формалаша башлаған кешеләр. Бына шуның өсөн дә йәштәрҙе тәрбиәләү — партия һәм комсомол ойошмаларының беренсе бурыстарынан һанала.

Бөтә йәштәр араһында политик эште яҡшыртыу өсөн беҙгә тәүге комсомол ойошмаларының эшмәкәрлек кимәлен күтәреүгә, уларҙы Ленин—Сталин партияһының нык булдыҡлы ярҙамсылары итергә кәрәк. Бының өсөн комсомолға партия етәкселегенең көсәйтелеүе талап ителә. Уның көсө, тап бына шунда.

Партия өлкә конференцияһынан һуң күп кенә ВКП(б) район комитеттәре комсомол ойошмаларына күберәк иғтибар һәм ярҙам итә башланылар. ВКП(б)-ның Дүртөйлә, Туймазы, Саҡмағош, Бөрө, Яңауыл район комитеттәре комсомолға етәкселек итеүҙе яҡшырттылар. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, бөтә урындарҙа ла былай эшләмәйҙәр әле. ВКП(б)-ның күп кенә район комитеттәре комсомол эше менән аҙ ҡыҙыҡһыналар, политик уҡыуҙарҙы ойоштороуҙа йомшаҡ ярҙам итәләр, түңәрәктәргә етәкселек итеү өсөн яҡшы пропагандистарҙы бирмәйҙәр, уларҙың эше менән ҡыҙыҡһынмайҙар. Мәҫәлән, Әбйәлил районында комсомол уҡыуҙары буйынса 77 түңәрәк ойошторолғайны. Ләкин уларҙың күпселеге таралды. Балтас районында ла шундай уҡ күренеш.

Байтаҡ ҡына ВКП(б) ҡала комитеттәренең һәм район комитеттәренең пропаганда һәм агитация бүлектәре комсомолда пропаганда эшмәкәрлегенә контроль яһамайҙар. Шуға күрә беҙ практикала телләнмәгән күренештәрҙе: үҙҙәренең кимәле тәнҡиттән түбән булыусыларҙың лекция һәм докладтар менән йәштәр алдында сығыш яһау (Стәрлебаш районында, Өфө ҡалаһында) күренештәрен осратабыҙ.

Иптәш Саяпов йәштәр араһында политик-тәрбиә эшенең торошона тулы рәүештә туҡталып, ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда һәм агитация бүлеге эшмәкәрлеген тәнҡитләне.

— Һуңғы ваҡыттарҙа, — ти иптәш Саяпов, — ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда һәм агитация бүлеге йәштәрҙе тәрбиәләү эше менән аҙ ҡыҙыҡһына башланы. Был хатта иптәш Шафиковтың докладынан да күренә, ул йәштәрҙе тәрбиәләүҙә етәкселектең нисек тормошҡа ашырылыуы тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәне. Һуңғы ваҡыттарҙа комсомол түңәрәктәренең эштәрен яҡшыртыу, пропагандистар бүлеү мәсьәләләре буйынса ВКП(б) Өлкә Комитетенең пропаганда һәм агитация бүлеге тарафынан бер төрлө күрһәтмә булманы, шулай уҡ ул был йәки теге районда йәштәрҙең политик мәғарифенең нисек ойошторолоуы менән дә ҡыҙыҡһынманы.

Черниковск машиналар төҙөү заводындағы ВКП(б) Үҙәк Комитете парторгы иптәш Толмачев партия ойошмаһының нисек итеп коммунистарҙың ойоштороусылыҡ ролдәрен көсәйтеү юлы менән үҙ предприятиеһенең эштәрен ҡырҡа яҡшыртырға өлгәшеүе тураһында пленумға һөйләне.

— Өлкә һәм ҡала партия конференциялары ҡарарҙарын ҡуллап, — ти иптәш Толмачев, — беҙ партия һәм массовый-политик эштәрҙе нигеҙҙән ҡайтанан төҙөүҙе үткәрҙек. Беҙ партия мәғарифе селтәрен киң йәйелдерҙек, агитаторҙарҙың эшмәкәрлектәрен көсәйттек, күргәҙмә агитацияның бик күп формаларын файҙалана башланыҡ. Бөтә был эштәрҙе бер маҡсатҡа — хеҙмәтсәндәрҙең социалистик аңлылығын, ижади активлеген күтәреүгә, йыллыҡ производство планын срогынан алда үтәү өсөн социалистик ярышты йәйелдереүгә буйһондорҙоҡ. Партия-политик эштәрҙе хужалыҡ бурыстарын хәл итеү менән дөрөҫ бәйләп алып барыу һөҙөмтәһендә беҙ шундай хәлгә өлгәштек: оҙаҡ ваҡыттар буйына артта ҡалып килгән заводыбыҙ программаны уңышлы рәүештә үтәй башланы.

Бынан ары иптәш Толмачев завод партия ойошмаһында булған етешһеҙлектәр тураһында һөйләй. Былар рәтенә ул шуларҙы индерә: бөтә эшселәр ҙә большевистик агитацияға йәлеп ителмәйҙәр, айырым агитаторҙар үҙ беседаларын дөрөҫ ойоштороуға һаман өйрәнә алмайҙар, үҙҙәренең идея-политик кимәлен күтәреү өҫтөндә бөтә коммунистар ҙа эшләмәйҙәр әле.

ВКП(б) Өлкә Комитете секретаренең нефть һәм химия промышленносе буйынса урынбаҫары иптәш Бикбов бик күп предприятиеләрҙәге һәм промыселдарҙәге партия ойошмаларының партия-политик һәм хужалыҡ эштәрен яҡшы бәйләп алып бара башлауҙары тураһында һөйләй. Шуның миҫал сифатында ул Ленин орденле Черниковск нефть эшкәртеү заводы, Туймазы промыселдәре, Черниковск химия заводы партия ойошмаларының эштәрен күрһәтә.

— Бында, — ти иптәш Бикбов, — эшселәр алдында етәкселәр, инженер-техник работниктар үҙҙәре йыш ҡына лекциялар, докладтар, беседалар менән сығыш яһайҙар. Массалар менән аралашыу процесында улар етешһеҙлектәрҙе, файҙаланылмай ятҡан резервтарҙы асалар һәм эште яҡшыртыу өсөн юлдар билдәләйҙәр.

Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, эш бөтә урындарҙа ла былай ҡуйылып бөтмәгән. Ҡайһы бер предприятиеләрҙә партия-политик эште производство бурыстарынан айырып алып баралар, администрацияның эшмәкәрлеге өҫтөнән партия контроле юҡ.

Күп кенә предприятиеләрҙә партия ойошмаларының татарҙар һәм башҡорттар араһында массовый-политик эштәрҙе әсә телдәрендә алып бармауҙары ҙур етешһеҙлек булып тора.

ВКП(б)-ның Нуримн район комитете секретаре иптәш Ишмаков коммунистарҙың партия уҡыуҙарын юлға һалыу буйынса эшләнгән эштәр тураһында һөйләй һәм агитаторҙарҙың политик белемдәрен күтәреү, етәксе кадрҙарҙың дәйем кимәлен күтәреү бурыстарына туҡтала.

— Районда ауыл хужалығы специалистәре менән идея-тәрбиә эштәрен көсәйтеү кәрәк, — ти Башҡорт АССР-ы Ауыл хужалығы министре урынбаҫары иптәш **Комаров.** Ул Өлкә Комитет пленумына был мәсьәләгә ҙур иғтибар итеүҙе һорап мөрәжәғәт итә.

— Өлкә партия конференцияһынан һуң, — ти Башҡорт АССР-ы Министрҙар Советы председателе урынбаҫары иптәш Ғәлиев, — ғилми-ағартыу, массовый-тәрбиә эштәре күренекле рәүештә йәнләнде. БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһе яҡшы эшләй башланы. Шулай ҙа, был яҡшырыу әле бөгөнгө талаптарға яуап биреп бөтөрә алмай. Культура-ағартыу эштәре өлкәһендә бик күп һәм серьез етешһеҙлектәр бар әле.

Күпселек райондарҙа киң массалар өсөн тәбиғәт-фәнни темаларға докладтар һәм лекциялар бик аҙ үткәреләләр. Район интеллигенцияһы (уҡытыусылар, врачтар, агрономдар, совет һәм хужалыҡ работниктәре) был эшкә ылыҡтырылмайҙар. Йыш ҡына лекциялар идея яғынан түбән кимәлдә уҡылалар. ВКП(б) район комитеттәре һәм культура-ағартыу работниктәре күп райондарҙа лекторҙар группаларына йомшаҡ етәкселек итәләр.

Был ғына ла түгел, күп райондарҙа (Әлшәй, Ауырғазы, Кушнаренко, Миәкә, Стәрлебаш) культура-ағартыу учреждениеләре эшләмәйҙәр, тип әйтерлек. БАССР Министрҙар Советы эргәһендәге культура-ағартыу учреждениеләре управлениеһе ошо көнгә тикләм үҙенең етәкселек итеүен тик ҡағыҙҙар-директивалар һәм инструкциялар ярҙамында ғына тормошҡа ашыра.

Киң халыҡ массаһы араһында культура-ағартыу эштәренең йомшаҡ булыуы һөҙөмтәһендә диндең тәьҫире күренекле рәүештә көсәйә башланы. Шул уҡ ваҡытта, дингә ҡаршы пропаганда күпселек райондарҙа бөтөнләй алып барылмай, тейерлек. Күп кенә коммунистар, хатта уларҙың етәкселәре, дингә ҡаршы пропаганданы алып барыуҙың хәҙер кәрәге юҡ, тип хата иҫәпләйҙәр. Мәҫәлән, ВКП(б) район комитете бюроһы ултырышында асыҡланыуынса, Архангель районының Горький исемендәге колхоз партия ойошмаһы секретаре иптәш Масайло шул ҡараштә булып сыҡты. Бындай миҫалдар бирмәк кенә түгелдәр.

Беҙҙең бурыс — дингә ҡаршы пропаганданы көсәйтеү, ауыл һәм ҡала хеҙмәтсәндәре араһында тәбиғәт-фәнни ағартыу белемдәрен киң таратыу, культура-массовый эштәр кимәлен ҡырҡа рәүештә күтәреү.

Иптәш Шафиковтың докладын буйынса фекер алышыуҙарҙа бөтәһе 10 кеше сығыш яһаны.

Икенсе промысел «Ишимбайнефть» тресы промыселдәре араһында бер нисә йылдан бирле алдынғы сафта килә, илебеҙгә пландан тыш меңдәрсә тонна «Ҡара алтын» бирә.

Һүрәттә: промыселдең Советтар Союзы ордендәре һәм медалдәре менән наградланған алдынғы кешеләренән бер төркөм. Һулдан уңға: элекке мастер, хәҙер ВКП(б) Үҙәк Комитетенең промыселдәге парторгы Х. Ш. Сәитов, партбюро секретаре Ф. В. Урманов, промысел директоры И. М. Погудов, нефть сығарыу мастеры Г. [illegible]ряков иптәштәр.

В. Жданов фотоһы.

Матбуғат күҙәтеү

Газетаға кемдәр яҙышалар?

— Был номерҙә нәмә тураһында бирергә инде?

Газетаның нәүбәттәге номерен сығарыу көнө килеп еткәс кенә, ҡайһы бер район газеталары редакторҙарында ошондай һорау тыуа.

Сөнки, редакцияның материалдар папкаһы буш. Авторҙар, хәбәрселәр менән тығыҙ бәйләнеш булмағас, мәҡәләләр ҙә, хәбәрҙәр ҙә юҡ. Номер алдан планлаштырылмаған, әҙерләнмәгән.

Ебел-гелә уйлағандан һуң ашығыс рәүештә, редакция сотрудниктәренең материалдар эҙләү «походы» башлана... Улар үҙҙәре исемдәренән һәм башҡа кешеләр булып та хәбәрҙәр, мәҡәләләр ҙә яҙып өлгөртәләр. Һөҙөмтәлә газета осраҡлы материалдар, массаның аҙ ҡатнашлығы менән донъяға сыға.

Тап бына ошо хәлде Йомағужа районы «Ударсы» газетаһында ла күрергә мөмкин.

1948 йылдың башынан 15 [illegible] 21 номеры [illegible]. Ләкин уларҙа, партияның тәүге ойошмалары секретарҙәренән — 1, ауыл Советтәре һәм колхоз председателдәренән — 2, агрономдарҙан — 2, уҡытыусыларҙан — 1, врачтарҙан — 1, звено етәкселәренән — 2, ферма мөдирҙәренән — 1 кеше генә ҡатнашлыҡ итте. Ә бригадирҙарҙан, механизаторҙарҙан, малсылыҡ алдынғыларынан сығыш яһаусы булманы. Газетала систематик рәүештә ҡатнашып килеүселәрҙең һаны 5—6 кешенән дә артмай. Хатта, Еңеү көнө — 9 майға ҡарата ойошторолған номерҙә лә бары 2 генә авторҙың (А. Васин һәм Костылев иптәштәрҙең) сығышы бирелде.

«Ударсы» газетаһы (редакторы иптәш Ғималетдинов) яңы ҡыҙыҡһына башлаған хәбәрселәр менән эш күрмәй. Бына ошондай фактты алырға кәрәк. Газетаның беренсе номерендә М. Горький исемендәге колхоздың звено етәксеһе Н. Ҡаҙҡаев иптәштең хаты баҫылды. Ул хатында:

«ВКП(б) Үҙәк Комитетенең февраль Пленумы ҡарарын намыҫ менән үтәү арҡаһында районыбыҙҙың күп кенә баҫыусылыҡ бригадалары һәм звенолары 1947 йылда юғары урожай алыуға өлгәштеләр. Беҙ уларҙың тәжрибәләрен өйрәнеп, 1948 йылда, беҙҙең звеноға беркетелгән 20 гектар майҙандың һәр бер гектарынан 20-шәр центнер бойҙай урожайы алырға йөкләмә алдыҡ. Районыбыҙҙың бөтә баҫыусылыҡ звеноларын да юғары урожай өсөн социалистик ярышҡа ҡушылырға саҡырабыҙ», — тип яҙҙы.

Яҡшы инициатива. Газета быны даими рәүештә, матур башланғысты күтәреп алырға, уға колхозсыларҙың, колхозсы ҡатын-ҡыҙҙарҙың яуаптарын ойошторорға — үҙенең хәбәрселәр составын арттырырға һәм иптәш Ҡаҙҡаевтың шулай уҡ газетаға уның кеүек беренсе тапҡыр хәбәр яҙыусы булғандарҙың да сығыштарын тағы ла ойошторорға тейеш ине. Ләкин ул быны эшләмәне. Ҡағиҙә рәүешендә, яңы авторҙар «Ударсы» газетаһына бер тапҡыр мәҡәлә йәки хәбәр яҙалар, икенсе тапҡыр яҙмайҙар. Яңынан-яңы мәҡәләләр менән сығыш яһамайҙар.

[illegible]

авторҙар һәм хәбәрселәр туплау өсөн массовый эштәр ҙә алып бармай: яҙыу өсөн әҙерлек [illegible] ҡанлы районда хәбәрселәр слеттары, матбуғат көнөндә газета уҡыусылар кәңәшмәләре үтмәне. Айырым мәсьәләләр буйынса хәбәрселәр рейдтәре лә ойошторолмай. МТС-тарҙа, ҙур колхоздарҙа уның хәбәрселәр посттары ла юҡ. Газета бөтә социалистик ярыштың һәм массалар алдынғылары трибунаһы булыуға ла иғтибар итмәй. Икенсе әйткәндә, киң массаға, авторҙарға, партия һәм совет активтарына таянып эшләмәй. Газетаның 1948 йылдағы номерҙәре шуны күрһәтәләр.

Район газетаһы — киң ҡатлау колхозсылар массаһына айырыуса яҡын торған газета. Теге йәки был мәсьәләне күтәргәндә һәр саҡ ҙа ул массаға мөрәжәғәт итергә, уларҙың тәжрибәләренә, кәңәштәренә таянырға тейеш.

Газетаның эшен яҡшыртыу — тематикаһын байытыу, ойоштороусылыҡ ролен күтәреү партия, совет активтәре менән, эшсе-колхозсылар һәм совет интеллигенцияһы менән яҡындан бәйләнеш тотҡанда ғына мөмкин буласаҡ. Был большевистик принципте «Ударсы» газетаһы редакцияһы оноторға тейеш түгел.

Район яңылыҡтары

Электрик тирмән төҙөлдө

Париж коммунаһы исемендәге колхозда электрик көсө менән эшләй торған тирмән төҙөлдө. Ул нормаль эшләгәндә тәүлегенә 3—3,5 тонна иген тарта ала.

Яңы тирмән күрше колхоздарҙы ла хеҙмәтләндерә.

(Ғафури районы «Ударник» газетаһы).

Яңы уҡыу йылына әҙерлек

Малаяҙ ете йыллыҡ мәктәбе яңы уҡыу йылына әҙерлек эштәрен уңышлы алып бара. Уҡыусы балаларҙың аталары һәм әсәләре мәктәптең ҡышҡа әҙерлек эшендә актив ҡатнашалар. Уларҙың ярҙамы менән 200 кубметр утын әҙерләнде.

(Салауат районы «Большевик» газетаһы).

Ауыр атлеттар конкурсы

Район физкультура һәм спорт комитете районда ауыр атлеттар конкурсы үткәрҙе.

Конкурста 23 кеше ҡатнашты. Иптәш Н. Самарский бер ҡулы менән ике ботло гирҙе, ергә тейҙермәҫтән, 114 тапҡыр юғары күтәреп, беренсе урынды алды. Икенсе-өсөнсө урындарҙы — [illegible] ботло гирҙе, шулай уҡ, [illegible] менән генә бер рәттән 41 тапҡыр юғары күтәреүсе В. Смертин, А. Макаров иптәштәр алдылар.

(Дәүләкән районы «Колхоз[illegible]» газетаһы).

„Беҙгә күп төрлө һәм яҡшы шағирҙар кәрәк"

Вл. Маяковский.

Сталин тураһында йыр

[illegible] яҡты—нурлы ҡояштан,
[illegible] ерҙә бөнөн дә тенән дә,
[illegible] хөрмәт, мөхәббәт үҙенә
[illegible] байбыҙ йөрәктәр түреңдә.
[illegible] һыи, тергәнен домналар
[illegible] йыллыҡ пландар турында,
[illegible] ләһез йөрәктәр йырлаһын
[illegible] уны—Сталин турында.
[illegible] ҙа [illegible] ар уйһыҡлар,
[illegible] нд баһыҡһын тағы ла
[illegible] ына яңылдар йырларға

Ватаным, Сталин данына!
Аталар, балалар, әсәләр,
Йырлайыҡ, Сталин турында,
Беҙҙе шат, бәхетле итеүсе —
Иң бөйөк атабыҙ—ул ғына.

Сәсәләр, йәмләгеҙ баҡсаны,
Йондоҙҙар, балҡығыҙ күгемдә!
Ҙур бәхет—Сталин—һәр ваҡыт
Балҡый ул тел беҙҙең күңелдә!

Риза Вәлиев.

Өс хат

[illegible] миңә өс хат яҙа,
[illegible] ғына алынған,
[illegible] өс ерҙән дә өс хат та
[illegible] менән аҙылған.

[illegible] Тыуған илдән,
[illegible] Башҡорт [illegible] ырынан,
[illegible] алып килгән
[illegible] колхоз ҡыҙынан.

[illegible] колхозыныҡ
[illegible] алда барыуын,
[illegible] үзем һәм күптәрҙең
[illegible] алыуын,

[illegible] — студентка хаты,
[illegible] ҡалаһында,
[illegible] үҙ бара. Сикһеҙ шат ул,
[illegible] атлыға.

[illegible] белмәйем, һиңән риза түгел
[illegible] «балл»ынан,
[illegible] булһа,
[illegible] генә алырын!

Өсөнсөһө — шаян әүсе ҡыҙҙан,
Уныһы токарь — тимер ҡырҡыусы,
Икө беҙгә үтәп эш нормаһын,
Төрлө машиналар ҡороусы.

Яҙа: бөгөн матур, а иртәгә
Тағы күңеллерәк буласаҡ,
Биш йыллыҡты — дүрт йылда
үтәүҙә
Ул һәр ваҡыт алда барасаҡ!

Өс туғаным миңә яҙа
Бер үк шатлыҡ, бер үк һиҙҙәрҙе,
Өсөһө лә миңә яҡындар,
Өсөһөн дә тигеҙ күрәмен.

Мин һаҡлайым илем тыныслығын,
Уның һыуын, ҡала, ҡырҙарын,
Мин һаҡлайым халҡымдың
бәхетен
Һәм бәхетен ошо ҡыҙҙарҙын!

Хәрмәт Биҡҡулов,
Совет Армияһы сержанты.

Минең планым

[illegible] заводта
[illegible] булып,
[illegible] уҡ утәй
[illegible] дә [illegible]

[illegible]

Улар икәү ярышалар
Бер-береһен уҙып,
Мин дә үҙемә алдым план
Күрәм ҡыҙығып:

Биш йыллыҡтың аҙағына,
Тик «бишлек» менән,
Данлы алтын медаль алып,
Уҡыу бөтәрәм.

Шуға күрә: йондоҙом, тип,
[illegible]й ҡосаҡлап, үбә,
[illegible]йем дә бик ярата —
[illegible] итәргә сәйә.

Ямғыр

[illegible] һәм [illegible] тына
[illegible] ҡарай ҡояш...
[illegible] күктәр күкрәве
[illegible] ҡаралды бер аҙ.
[illegible] ҡомартҡарға боҫоп,
[illegible] мондарын,
[illegible] ишмәләр, иҫе китмәй,
[illegible] үҙ йырҙарын.
[illegible] баҫҡан уландарҙы
[illegible] елдәр тараны,
[illegible] япраҡтары
[illegible] береһе барланы
[illegible] йылтырап китте,
[illegible] сатҡыны уйнай.

Ямғыр шаршауы һүҙылды
Тотоҡ баҫыуҙы буйлап...
Үтеп китте ҡаты ямғыр,
Һибеп әрә тамсылар,
Тупраҡ йыуылды, уландар
Текә тороп баҫтылар.
Сәскәләр ҙә йылмайҙылар,
Рәхмәт әйтеп ямғырға,
Игендәр ҙә туйындылар,
Яңы тоҫ инде ҡырға.
Үтте ямғыр. Коштар ҡабат
[illegible]те йөрәк хистәрен,
[illegible]тырай шишмә Йәшел донъя
[illegible]кә саф, хуш еҫтәрен.

Ирғай Чаныш.

Дуҫтар

[illegible] дуҫтар—иркен ҡырҙарҙа
[illegible]-бешеп эшләп кос түгә,
[illegible] күрә һәр бер гектарҙа
[illegible] ҡеңвер иген үҫтерә.
[illegible] дуҫтар—тәрән шахтала
[illegible] тыш күмер сабылар,
[illegible] дуҫтар кисә буш ятҡан
[illegible]ҙа завод һалалар
[illegible] дуҫтар—беҙҙең тормоштоң
[illegible] булған балалар,
[illegible] уҡып, бәтә фәндәрҙән
[illegible] белдейҙе генә алалар.
[illegible], таҙа үҫәләр
[illegible] иң гүзәл осоронда,
[illegible] хөрмәтләп
[illegible] үҙенең йырында.
[illegible] дуҫтар алған эштәрен
[illegible] менән башҡара,
[illegible] алды енеүгә
[illegible] бөйөк башҡала.

Марат Кәримов.

Башҡорт музыкаль училищеһында

[illegible] Башҡорт госу-
[illegible] музыкаль училищеһенең
[illegible] уҡыу йылы тамамлана.
[illegible] училищ-
[illegible] башҡорт совет музыкаль куль-
[illegible] үҫтереүҙә ҙур роль уйна-
[illegible] талантлы күп кенә искусство
[illegible] хеҙмәткәрҙәре тәрбиәләп сығарҙы.
[illegible] училище Башҡортостандың
[illegible] артистары Ильбаева,
[illegible], Болотов һәм башҡалар
[illegible].

[illegible] училище 32 музыкант —
[illegible], вокалист, баянист һәм
[illegible] дирижерҙары сығара. Улар
[illegible] театрҙарында, филар-
[illegible] бригадаларында эшләрсә, а
[illegible] музыкаль белемдәрен
[illegible] ерҙә [illegible] Бы-
[illegible] араһында музыка отличникта-
[illegible] — баясы Софья Вәлидова, бая-
[illegible] Сиразетдинов, пианист
[illegible] Буале һәм башҡа иптәштәр
[illegible].

Атлы егет

Колхоз һабан туйын көтөп
Июнь таңын ҡаршыланыҡ.
Уянды Урал боркөтө,
Юлдан шыуҙы ҡаршылауыҡ.

Яйыҡ һыуын күҙгә итеп,
Ҡарап тора ҡарт муйылдар,
Быуындан-быуынға һикереп
Арыш үҫә юл буйында.

Хеҙмәт туйын уҙғарырға
Йыйылғандар йәштәр, ҡарттар,
Көрәшселәр билгәү бора,
Ярһып һикерә етеҙ аттар.

* * *

Көтмәгәндә ҡара болот
Алды урап илем күген.
«Һуғыш!» — һүҙе, асыу булып,
Үҙгәртте һәр кемдең йөҙөн.

Тулҡынланды атлы егет
«Асыу—ул ҙур ярһыу»—тиҙәр.
Һабан туй сергеһе урынын —
Алмаштырҙы ҡашлы эйәр.

* * *

Туҙан туҙҙы, ат уйнаны,
Ҡылыс һурылды ҡынынан.
Башҡорттоң батыр улдары
Киттеләр һуғыш ҡырына.

— Ир батыры — ил батыры!
(Ҡиммәтле һүҙҙәр әйтелде):
— Дошманды еңеп ҡайтығыҙ,
Көтәрбеҙ ҡыш һәм йәй көнө.

Ярһып башын сайҡай саптар,
Егет һөйгән ҡыҙын үбә,
Ғәйеп түгел күрһәләр ҙә —
Дуҫтар айырылышҡан көндә.

* * *

Арыҫландай ҡыйыу егет
Ҡылыстан алманы ҡулын.
Дошман юлын ҡамаланы
Кәрәк ерҙә, ҡойма булып.

Оҙон юлды үтеп, егет
Берлиндең ҡапҡаһын асты.
Йылмайҙы ул, ҡояш кеүек,
Йөрәгендә таттар тапты.

* * *

Туҙан туҙҙы, ат уйнаны,
Батырҙар ҡайттылар яуҙан.
Ҡолас йәйҙе аҡ ҡайындар,
Баштарын әйҙеләр тауҙар.

Колоннала ялбыр яллы
Саптар атты мин таныным:
Колхоз ҡыҙы ҡаршыланы
Һөйгән йән киҫәген һағынып.

Үҙгәреш ҙур был егеттә:
Ҡара сәсенә салдар кергән,
Һуғыш яраһы битендә,
«Дан» ордене һул яҡ түштә.

Алып ҡайтты ул көрәштән
Баҫынҡы асыҡлыҡ йөҙҙә,
Ғәйрәтлелек һәр бер эштә,
Түҙемлелек ҡара күҙҙә.

Һоро шинеленән ҡаҡты
Һуғыш һөрөмөн йәш егет:
Ялға ҡуйҙы саптар атын,
Тракторҙы эшкә егеп.

Ғәзим Аллай.

Ябай тракторист

Ҙур оҫталыҡ, ҡыҙыу темптар менән
Сәсеү пландарын үтәгәс;
Ҡарап торам: һинең тракторың
Алдан килә, байраҡ күтәргән.
Мул уңыштар алдыҡ үткән йылда
Һин эшкәрткән ошо баҫыуҙан,
Беҙ анланыҡ, яҡташ, ныҡ
анланыҡ:
Хеҙмәт бирҙе һиңә аҫыл дан;
Күкрәгеңдә көмөш медаль
балҡый, —
Батыр хеҙмәттәрең өсөн,
Маҡтау һиңә, яҡташ, һәм дан
һиңә,
Ябай тракторист — еңеүсе!

Рәхим Истамгул.



Һүрәттә: Өфө ял йортонда.

М .Әхмәтьянов фотоһы.

ДИМ

Минең тыуып, үҫкән ауылым
Йәмле Дим буйында ултыра,
Их, йырлағы килә, дуҫтар,
Тыуған ерҙең күрке турында..;

Таҫ көмөштәй йылтырап аға һыуы,
Сәскәләргә сумған ярҙары,
Хәтерләтә гүзәл музыканы
Урманында ҡоштар һайрауы.

Тирләп эштән ҡайтҡас, ял итергә,
Дим буйына ашығып киләбеҙ,
Һыу сәсрәтеп, тулҡын тирбәлдереп,
Кирелеп, ҡолас ташлап йөҙәбеҙ.

Күпме йәштәр ошо Дим буйында
Батыр, таҙа булып үҫтеләр...
Улар баҫыуҙарҙа дан ҡаҙанды,
Һуғыштарҙа ут, һыу үттеләр!

Европала Димдең егеттәре
Аяҡ баҫмаған ер ҡалманы.
Дим туҡтамай ағыр,
Дим буйында
Тағы күп батырҙар тыуырҙар,
Улар ҙа хеҙмәттә һәм көрәштә
Беҙҙең данлы юлды ҡыуырҙар.

Закуан Мөхәмәтьянов.

Китап

Китап! Һинең менән маҡтәп
бөттөк, —
Икәү бергә киттек һуғышҡа,
Йәнәшәнән атакаға барҙыҡ,
Бергә алдыҡ хатта һулыш та.

Икәү госпиталдә ятҡан саҡта,
Уртаҡлаштың яра һыҙлауын,
Хат килмәһә әйҙән, Ниғмәтиҙең
«Кәләш хатын» уҡып йыуандыҡ.

Дүрт йыл ял итмәҫкә тура килде
Ватан өсөн яуҙа — фронтта,
Ә һин, китап, һаман беҙҙең өсөн
Ял йорто ла булдың, курорт та.

Еңеү даны менән илгә ҡайттыҡ,
Заводтарға, колхоз ҡырына.
Ә беҙ, ҡәҙерле дуҫ, һаман бергә,
Сәсеүҙә лә, иген урыуҙа.

И. Фәрит.

Уңышлы юл

Медицина институтын тамамлаусы дуҫыма:

Беләм, иптәш, үҙең әйтмәһәң дә,
Һинең йөрәк нисек типкәнен:
Бөгөн—иртән, врач исеме алып,
Ҙур тормошҡа атлап киләһең.

Уйлап ҡара, ниндәй маҡтаулы эш
Хеҙмәт эйәләрен дауалау, —
Биш йыллыҡтың данлы еңеүенә
Һинең хеҙмәтең дә ялғана!
Бәлки, тәүге ауырлыҡтар булыр.:

Хеҙмәт юлы — уйын түгел ул,
Ләкин башың эймә, ҡыйыу атла,
Минән һиңә яҡты теләк шул.

Иптәштәрең килер оҙатырға,
Ҡулдарыңды ҡыҫып ҡалырҙар,
Айырылырбыҙ, ләкин теләктәрем
Һәр саҡ һинең менән барырҙар.

Салауат Тупеев.

Күптәнге дуҫ

Ҡайҙа осраштыҡ без
Эшелонда...
Одессала..:
Двина ярында...
Госпиталдә...
Әллә атакала...
Әллә Рейхстаг янында?..
Ҡисер, иптәш, хәтерләй алмайым,

Туҙан баҫҡан һуғыш юлдарын,
Бәлки, бергә булып булмағандыр..:
Тик бергә йөрөгәндер уйҙарым,
Һин, илемдең гүзәл патриоты,
Хеҙмәттә лә бөгөн дан алдың,
Газетала күрҙем тик исемеңде
Һәм күптәнге дуҫым һананым!

Файзи Сиразетдинов.

Герой ҡыҙ

Ябай ауыл ҡыҙы беҙҙең алда —
Бер геройы Тыуған илемдең,
Ул ҡулына ҡорал тотто яуҙа,
Күҙенә тура ҡарап үлемдең:
— Илем!, тине, көсһеҙләнгән
саҡта,
Һәм кес инде уның ҡанына,
Сталинде йөрәгендә һаҡлап,
Атакаға барҙы яныңан,
Һалҡын тәндә уға ҡояш булды
Мөхәббәте тыуған халҡтың
Һәм был һөйөү киҫеп үлем юлын,
Гранит ҡая булып ҡалыҡты.

Бер геройы булып тыуған ерҙең
Ҡайтты ул Уралын һағынып,
Өлгөрмәне котомкаһын һалып,
Шинель туҙандарын ҡағынып,
Ҡырға китте. Яңы фронт.
Һалдат көтә инде был ҡырҙар,
Һәм, тәүге ҡат, уның күҙҙәренән
Шатлыҡ тамсылары тамдылар.
Ошо инде хәҙер һуғыш ҡыры —
Бер фронты коммунизмдең,
Бында яңғырай тыныс тормош йыры
Маҡтап бөйөкләгән илемдең.

Әсхәт Мирзаһитов.

Яңы тауыштар

Совет халҡы—коммунизм тө-
зеүсе халҡ—ның үҫкән аҡыл эйә-
һе, ҙур яҡлы ижадсы ла, шағир
ҙа ул. Кешене кеше иткән хеҙмәт
капиталистиҡ илдәрҙә, айырыуса,
Үҫәренә ҡалға, «демократияның»
[illegible] сайҡан Америкала, ке-
шене кол итәй, ғарипләндерә, ав-
томат, машина һәм конвейерҙәр-
ҙең ниһыҙ бер өлөшөнә әйләндерә.
Совет кешеһе өсөн, киреһенсә,
хеҙмәт — дан, ғорурлыҡ, рухани
[illegible]тлек. Сөнки беҙҙә хеҙмәт —
[illegible]. Кеше үҙен иҙеүсе бер төр-
көм ырҡтыҡсарҙын байыуы өсөн
тир түкмәй, үҙенең Ватаны өсөн,
[illegible] үҙе өсөн эшләй. Аңлы, со-
вет кешеһе күек иң прогрессив
кеше ижадтың теләгән бер төрөнә
һәләт. Беҙҙә шуға күрә, быға-
са ҡулына тәтә ҡәләм дә тотоп
ҡарамаған кешеләрҙең шиғыр
яҙыуға ынтылыуҙары бер ҙә иҫ
китерлек хәл түгел. Улар үҙ күк-
рәктәрендә ташҡан шатлыҡ той-
ғоларын, тормош гүзәллегенә
сикһеҙ һоҡланыуҙарын йырларға,
Ватанды һәм уның яңы өлгәшеүҙә-
рен данларға теләйҙәр. Үҙ саф
тойғоларын улар башҡалар менән
дә уртаҡлашырға теләйҙәр. Былай
башлап шиғыр яҙыусыларҙын күп-
селеге — йәштәр. Һәм был бик
тәбиғи ҙә: сөнки, йәшлек үҙе—ши-
ғыр ул. Совет әҙәбиәте, ана шулай
хеҙмәт халҡы араһынан сыҡҡан
йәш таланттар иҫәбенә, йылдан-
йыл байый, кадрҙары сафын тулы-
ландыра бара. Халҡ—бөтмәҫ ижад
сығанағы, көс шишмәһе.

Большевиктар партияһы йәш
көстәрҙе әҙәбиәткә ылыҡтырыуға
сикһеҙ ҙур иғтибар бирә, уларҙы
дөрөҫ тәрбиәләү, тулы баһалы
итеп үҫтереү өсөн бөтә шарттарҙы
тыуҙыра. Шуның һөҙөмтәһе бу-
лып, Бөйөк Ватан һуғышы йылдары
һәм унан һуңғы икенсе йыл эсен-
дә генә лә бик күп яңы яҙыусы-
лар тыуҙылар. Былтыр һәм быйыл
иң яҡшы әҙәбиәт әҫәрҙәре өсөн
бирелгән Сталин премияһын алыу-
сылар араһында йәш яҙыусылар-
ҙың күпселек урын тотоуҙары —
шул атайҙарса хәстәрлек һөҙөмтә-
ләре тураһында һөйләй.

Башҡорт совет әҙәбиәтендә лә
был осор эсендә байтаҡ яңы
исемдәр күтәрелеп сыҡтылар. Беҙ-
ҙә хәҙер, күренекле яҙыусылар
менән бер рәттән, быйыл ғына бе-
ренсе китаптары сыҡҡан — Х.
Ғиләжев, Ш. Биҡҡол, Ғ. Рамаза-
нов, Ф. Лоҡман һәм башҡа йәш-
тәрҙең исемдәре лә халҡта та-
ныла бара. Һәм беҙ шундай йәш-
тәрҙең һәр ваҡыт арта барыуын
күрәбеҙ. Был бик ҡыуаныслы
хәл. Ул туҡтауһыҙ үҫеш, культу-
раның еңеүҙәре тураһында һөй-
ләй.

Бөгөн беҙ газетабыҙҙа әҙәбиәт
бите бирәбеҙ. Бында шиғырҙары
баҫылған иптәштәрҙең исемдәре
матбуғат битендә тәүләп кенә кү-
ренә. Улар әле бик йәштәр һәм.
үҙҙәренең күпселегендә, яҙыусы
булыуҙы ла, бәлки, маҡсат итеп
ҡуймағандарҙыр... Шуға ҡарамаҫ-
тан, уларҙа билдәле күләмдә һә-
ләтлек, матурлыҡ тойоу, совет ке-
шеләренә уртаҡ теләктәрҙе сағыл-
дыра белеү үҙенсәлектәре бар.
Улар хеҙмәткә, Тыуған илгә дан
йырлай. Был яҡтан айырыуса Хәр-
мәт Биҡҡолов, Ғәзим Аллай һәм
И. Фәрит шиғырҙары характерле.

«Өс хат», «Атлы егет», «Күп-
тәнге дуҫ», «Китап» шиғырҙары,
хатта, инде өлгөрөп килгән шағир-
ҙарҙың әҫәрҙәрен хәтерләтә. Ҡал-
ған шиғырҙар — ҡыйыуһыҙыраҡ,
тәүге аҙымдар ғына, бары баш-
лаңғыстар.

Газетала беренсе шиғырҙын ба-
ҫылып сығыу ул — инде һин ша-
ғир булдың икән, тигән һүҙ түгел.
Беҙ был иптәштәрҙе ундай хата
ҡарашҡа бирелеп китмәҫкә алдан
уҡ иҫкәртәбеҙ. Уңышлы ғына бер
нисә әҫәрҙәр яҙып та, сыҙам, ны-
ҡышмалы эш булмау арҡаһында,
юғалып ҡалған исемдәрҙе әҙәбиәт
аҙ белмәй.

Был — тик ҡәләм һынап ҡарау,
үҙ тауышыңды дөйөм тауышҡа
ҡушыу ғына. Был иптәштәргә,
әгәр улар киләсәктә әҙәбиәт про-
фессияһы һайларға уйлаһалар, үҙ-
ҙәрен шул эшкә тулы яуап бирер-
лек итер өсөн бик күп әҙерләнергә
кәрәк әле. «Яҙыусылар — кеше
рухының инженерҙәре», тип юғары
баһаланы ҡәләм хеҙмәте эшселә-
рен И. В. Сталин. Был һүҙҙәр
эсендә яҙыусыға бөйөк хөрмәт тә,
уларға булған сикһеҙ ҙур талап та
ята. Яҙыусы — совет кешеләрен
коммунизм рухында тәрбиәләүгә,
уларҙың аңындағы капитализм
ҡалдыҡтарын көйҙәрәп, яңы аң-
дарҙы үҫтереүгә саҡырылған. Бы-
ның өсөн, барынан элек, үҙенә бик
күп белергә, замананың аңлы,
иң алдынғы кешеһе булырға кә-
рәк. Шунһыҙ — үҙ алдына ҡуйыл-
ған талаптарға тулы яуап биреү
мөмкин түгел. Ә талаптарға яуап
бирә алмайһың икән, һин — артта
ҡалдың, үҙ бурысыңды үтәй алма-
йын тигән һүҙ. Сөнки беҙҙә кеше
көндән-көн үҫә, алға бара, кисә
яңы булған күп нәмәләр — бөгөн
иҫкегә әйләнәләр. Советтар Союз-
ының данлы ҡыҙы — беренсе
трактористка Паша Ангелинаның
«Октябрь» журналында баҫылған
«Колхоз баҫыуҙарының кешеләре»
тигән автобиографик очеркында
шундай бер урын бар. Колхоз
председателе Д. Коссе: «Правле-
ниелә һирәк күренә башланың
әле», тип Пашаны шелтәләй.

«— Хәтерем ялғышмаһа, кисә
мин һеҙҙең менән күрештем буғай,
— тинем мин,

Дмитрий Коссе иҫенә төшөрҙө.

— Кисә? Дөрөҫ, дөрөҫ. Кисә.
Ләкин бөгөн эштәр яңы бит...»,

Бына ошолай тыуа барған яңы-
лыҡтарҙы күрә белеү, үҫеүсе ке-
шеләрҙең талаптарына яуап биреү
өсөн әҙерләргә кәрәк үҙеңде. Был,
билдәле, күп уҡыуға, тормошто
бөтә яҡлап өйрәнеүгә бәйләнгән.
Бөйөк социалистик реалист, совет
яҙыусыларының уҡытыусыһы
А. М. Горький, йәш авторҙарға
ҡарата: «Уҡырға, үҙ белемеңде
киңәйтергә, үҙеңдең ысынбарлыҡ-
ты таныу һәләтеңде үҫтерергә,
үҙең өсөн һайлаған мөһим һәм
яуаплы революцион эштең (яҙыу-
сылыҡтың — Б. Б.) техникаһына
эйә булырға кәрәк» тине. Шулай
уҡ ул: «Художник — үҙ иленең
һәм үҙ синыфының һиҙеүселеге,
уның ҡолағы, күҙе һәм йөрәге;
ул—үҙ осороноң тауышы. Ул күп-
те белергә мәжбүр, һәм үткәнде
ни тиклем күп белһә, уға бөгөнгө
заман шул саҡлы ныҡыраҡ аңла-
йышлы булыр, шул тиклем ул,
беҙҙең замандың универсаль рево-
люционлығын һәм алда торған бу-
рыстарҙың киңлеген тәрәнерәк аң-
лар. Халҡтың тарихен һәм шулай
уҡ уның социаль-политик фекер
йөрөтөүҙәрен белергә кәрәк», ти-
гән талапты ҡуйҙы.

Башлап яҙыусы йәштәр ошо та-
лаптар юғарылығынан сығып эш
күрһәләр, һис шикһеҙ, уңыш ҡаҙа-
насаҡтар.

Беҙҙең илебеҙҙә кешенең һәр
яҡлап үҫешенә бөтә мөмкинлек-
тәр бирелгән. Әгәр ул яҙыусы бу-
лырға теләй икән, үҙен шуға һә-
ләтле таба һәм әҙерләй икән,
ҡыйыу атлай ала. Тик үҙен
һайлаған хеҙмәтте йән-тән менән
һөйөргә, уның ысын мастеры бу-
лып, бөтә көсөңдө Ватанға, халҡ-
ҡа намыҫлы хеҙмәт итеүгә бирергә
кәрәк. Намыҫлы хеҙмәт үҙенең
мул емешен бирмәйенсә [illegible].

Баязит Бикбай.

Колхоз егете

Ҡояш ҡалҡа. Ҡырҙар өҫтөн
биҙәп,
Ҡалҡып сыға һалҡын ер быуы,
Буҙ турғайҙың моңо һауа телеп,
Ишетелә гүзәл йыр булып.
Ҡара таҫма—һабан төрәненән —
Һуҙылып ҡала, дымлы ер кәҫе.
Ғорур атлай, ҡырҙар эшен һөйгән
Колхоз егете—ялан иркәһе.
Егет бына, сикһеҙ ҡырҙар аша,
Алға ташлай үткер ҡарашын;
Йөрәгендә йылы хистәр таша,
Иҫәпләһә гектар араһын.
Был ҡырҙарға һыймай, бына
тиҙҙән
Диңгеҙ булып иген тулҡыныр.;
Уны ҡотлап балҡыр
Офоҡтарҙа йөҙгән
Һәжигәйҙең алһыу ялҡыны;

М. Хазнев.

„Клуб сәхнәһе"

Художестволы үҙәшмәкәрлеге
һәм драма түңәрәктәре өсөн ре-
пертуар йыйынтыҡ баҫылып сыҡ-
ты. Төҙөүсеһе Р. Сыртланов, 152
бит, тиражы 4000, хаҡы 6 һум.

Художестволы үҙәшмәкәрлек
өсөн бик кәрәкле булған был йы-
йынтыҡ өс бүлектән тора. Берен-
се бүлектә — художестволы уҡыу
өсөн булған материалдар. Бында
В. Маяковскийҙең «Совет паспор-
ты тураһында» шиғыры, Б. Бик-
байҙың «Ленин», Әкрәм Вәлиҙең
«Һин килгерҙең», Жамбулдың
«Иген йыры», Х. Кәримдең «Биш
йыллыҡ уттары», С. Ҡудаштың
«Иҙел өҫтөндә һал килә» тигән
шиғырҙары һәм С. Агиштең «Ни-
ҙе» исемле хикәйәһенән өҙөм-
тә бирелгән.

Китаптың икенсе һәм иң ҙур бү-
легендә бер актлы тугыҙ пьеса
бирелгән. Китаптың өсөнсө бүле-
генә йырҙар урынлаштырылған.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһендә ҡабул ителгән белдереүенә сит ил матбуғатының откликтәре

Чехословакия

ПРАГА, 25 июнь. (ТАСС). СССР, Албания, Болгария, Чехословакия, Югославия, Польша, Румыния һәм Венгрия Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһендәге белдереүен Праганың бөтә газеталары ҙур баш биреп иғлан иттеләр.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре кәңәшмәһенең белдереүен Чехословакияның киң общественносе ҙур хуплау менән ҡаршыланы. Был документтең иғлан ителеүе политик ҡругтар тарафынан Советтар Союзының һәм яңы демократия илдәренең тыныслыҡты һәм демократияны ныҡытыу эшенә яңы, мөһим вкладтары, тип баһаланды.

«Лидова Новины» газетаһы Сит ил Эштәре Министрҙәренең белдереүен тыныслыҡ манифесе тип атай. Башҡа газеталар тыныслыҡты һәм имиңселекте ныҡытыу өсөн белдереүҙең ғәйәт ҙур әһәмиәтен айырыуса билдәләйҙәр һәм бер үк ваҡытта Германия тураһында көнбайыш державаларҙың Лондон конференцияһы тик империалистик маҡсаттарҙы — Көнбайыш Германияны АҠШ-тың һәм Великобританияның стратегик базаларына әйләндереү маҡсаттарын ғына күҙҙә тота, тип күрһәтәләр.

Венгрия

БУДАПЕШТ, 25 июнь. (ТАСС). Башҡала газеталары һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшавала булып үткән кәңәшмәһе тураһында хәбәр итәләр. Венгрия хеҙмәтсәндәре партияһының үҙәк органы «Сабад Неп» өс державаның Лондон кәңәшмәһендәге ҡарарҙарын законлы түгел тип айырыуса күрһәтә. Лондон кәңәшмәһе Потсдам килешеүен боҙоо һәм Көнбайыш Германияны АҠШ һәм Англияның хәрби маҡсаттарында файҙаланыу өсөн Көнбайыш Германия хөкүмәтен төҙөүҙе әҙерләне.

Венгрия профсоюздары газетаһы «Нопсава» түбәндәге белдереүҙе иғлан итә: «Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһе берҙәм Германия менән етәкселек итеү өсөн тыныслыҡ һөйөүсе хөкүмәт төҙөүҙе талап итә».

Ваҡ ауыл хужаларының бойондороҡһоҙ партияһының үҙәк органы «Киш уйшаг» һәм «Сабадшар» газетаһы Варшава кәңәшмәһендә ҡатнашыусы һигеҙ сит ил государстволарының, башында берҙәм демократик хөкүмәт торған берҙәм демократик Германияны төҙөргә, герман агрессияһынан интеккән илдәргә репарация түләүҙе тәьмин итергә теләүҙәрен айырыуса күрһәтәләр.

АҠШ

НЬЮ-ЙОРК, 25 июнь. (ТАСС). Америка матбуғаты Варшавалағы кәңәшмә тураһында беренсе хәбәрҙәрҙе иғлан итә. «Нью-Йорк Таймс» газетаһы үҙенең хәбәренә түбәндәге исемде биреп баҫа: «Һигеҙ государство Германияға ҡарата дүрт яҡлы саралар күреүҙе талап итәләр, ваҡытлы режим булдырыуға, оккупацияны бер йылдан һуң бөтөрөү маҡсаттарында ярашыу договоры төҙөргә саҡыралар».

Англия

ЛОНДОН, 25 июнь. (ТАСС). Англияның бөгөн һуңлап сыҡҡан газеталары һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең белдереүҙәрен аңлатыусы агентстволарҙың хәбәрҙәрен беренсе биттәргә урынлаштыралар. Күпселек газеталар белдереүҙә күрһәтелгән тәҡдимдәр — демократик, ваҡытлы дөйөм Германия хөкүмәте төҙөү тураһында, Рур ауыр промышленносе өҫтөнән дүрт державаның контроле тураһында, Германияны демилитаризациялауҙы еренә еткереү тураһында, Потсдам ҡарарҙарына ярашлы рәүештә, репарациялар һәм Германия менән ярашыу договоры төҙөү тураһында яҙалар. Газеталар был тәҡдимдәрҙе «Биш талап», тип характерлайҙар.

«Таймс» һәм «Дели телеграф энд Морнинг пост» газеталары, башҡа газеталарға ҡарағанда, был хәбәрҙәргә күберәк урын бирәләр һәм белдереүҙең, өс державаның Лондондағы кәңәшмәһе ҡарарын тәнҡитләүсе өлөшөнән ҙур өҙөктәр урынлаштыралар. Газеталар хәбәрҙәргә түбәндәге исемдәрҙе иғлан итәләр: «Ньюс кроникл» — «Көнсығыш илдәре Германия менән ярашыу договоры төҙөүҙе талап итәләр», «Дейли экспресс» — «Россия Германиянан ғәскәрҙәрҙе сығарыуҙы талап итә», «Дейли телеграф энд Морнинг пост» — «Россия Германия тураһында дүрт яҡлы договор төҙөүҙе талап итә» тип белдерҙеләр.

Англия кабинетенең 24 июнлә булып үткән ултырышын газеталар киң яҡтырталар. Ҡайһы бер хәбәрселәр, кабинет члендәре Берлиндәге хәлде һәм Варшава кәңәшмәһе тураһында тикшерҙеләр тип фекер йөрөтәләр, шул уҡ ваҡытта, ҡайһы бер хәбәрселәр һүҙ «Маршалл планы», Лондон докерҙәренең забастовкаһы тураһында барған, тип уйлайҙар.

«Йоркшир пост» газетаһы, һуғыш ваҡытындағы союзниктәр араһында хәҙер бер фекерлелек юҡ, тип күрһәтеп, былай яҙа: «Европа ике өлөшкә бүленә. Европаны икегә бүлеүсе һыҙыҡ Берлин аша үтә. Ҡалалағы тәртипһеҙлек ошо бүлеүҙең һөҙөмтәһе».

Газета, немец халҡы берҙәм Германия төҙөргә ынтыла, көнбайыш зоналарҙағы немец халҡы көнбайыш алты илдең килешеүен хупламай һәм уны «берлешеүгә пролог» тип атай, тигән күп мәғлүмәттәр бар, тип яҙа.

Франция

ПАРИЖ, 25 июнь. (ТАСС). Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең кәңәшмәһенә ҡағылып, Париждың радио күҙәтеүсеһе, белдереүҙәге Германия мәсьәләһе буйынса тәҡдимдәрҙе аңлата һәм белдереүҙең тәүге өлөшөндә Лондон конференцияһы ҡарарына ҡаршы протест белдерелә, тип билдәләй. Шуның менән бергә, радио аша бирелгән күҙәтеүҙә Лондон конференцияһы сепаратный рәүештә, Потсдам ҡарарҙарын боҙоп, үткәрелде, тип әйтелеүе күрһәтелә.

Финанс эксперттәренең дүрт яҡлы комиссияһының Берлиндәге ултырышында совет вәкиленең белдереүе

БЕРЛИН, 23 июнь. (ТАСС). Киcә контроль Совет бинаһында үткәрелгән финанс эксперттәренең дүрт яҡлы комиссияһы ултырышы 23 сәғәттә һөҙөмтәһеҙ тамамланды. Көнбайыш державаларҙың вәкилдәре Берлиндең, үҙҙәре ҡарамағында булған, 3 секторында көнбайыш аҡсаһын индереүсектәре тураһында белдерҙеләр. Шуның менән бергә улар Берлин менән дүрт яҡлап идара итеү статутына һылтандылар.

Был һылтаныуҙарға Совет эксперте тарафынан тейешле отпор бирелде. Ул, көнбайыш оккупация зоналарында сығарылған яңы аҡсаның йөрөшөн тыйыу тураһында Германиялағы совет хәрби администрацияһының белдереүе үҙ көсөндә ҡала, тине.

Көнбайыш эксперттәр беҙ Берлиндәге үҙ секторҙарыбыҙ өсөн билдәле күләмдә аҙыҡ-түлек һәм күмер бирәбеҙ һәм Берлинга ебәрелгән был поставкалар өсөн кем түләйәсәк икәнен беләһебеҙ килә тип һылтанғас, совет эксперте Малетин былай тип яуап бирҙе: Берлин халҡына ҡайтарып алмау шарты менән аҙыҡ-түлекте, шулай уҡ, совет яғы ла бирә. Берлингә дүрт яҡлы поставкалар буйынса расчеттар яһау хәрби администрацияларҙың счеттарына теркәлеп барылған яҙмалар буйынса үткәрелә, шуның өсөн дә был поставкаларҙың Берлиндә ниндәй аҡса йөрөйәсәгенә бер ниндәй ҙә ҡатнашлығы юҡ.

Фельетон

Манилов алымы менән

«...Манилов... ултырғыска ултырҙы ла, тәрән уйға батты... уның хыялында, дуҫы менән, ниндәйҙер бер йылға буйында йәшәүе кәүҙәләнде, унан һуң йылға аша күпер һалына башланы, унан һуң шундай бейек манаралы, хатта, башынан Мәскәүҙе күреп булған, ҙур йорт, кисен унда (Мәскәүгә ҡарай-ҡарай) асыҡ һауала сәй эсеп ултырыуҙар... һәм уларҙың (Чичиков менән) бындай дуҫлығын белеп, батша уларҙы генералдар яһағаны күҙ алдына килде...»

Маниловтың хыялын Гоголь шулай кәүҙәләндерә. Ләкин хәҙерге заман — конкрет эш, геройлыҡ осоро. Шуға күрә булһа кәрәк, Өфө ҡала Советенең коммуналь хужалығының начальниге Петровский һәм уның урынбаҫары — баш инженер Шаргин эште иң элек ҙур һыу — матур Ағиҙел тураһында уйлауҙан башлайҙар. Һәм ҡаланы матурлауға, ҙур йорттар һалдырыуға, Ағиҙел аша күпер һалдырыуға ҡала Советен ышандыралар. Ҡала Советы уларға яуаплы эш — коммуналь хужалыҡты идара итеүҙе тапшыра. Контора Өфөнөң иң матур йортонда, Ленин баҡсаһына ҡаршы, үҙәк урамда урынлаштырыла. Кабинет бай йыһазландырыла. Ҙур тәҙрәләрҙең пәрҙәләрен асып, тәҙрә янына баҫып уйланырға бөтә шарттар тыуҙырыла.

Петровский «конкрет» эшкә тотона. Әлбиттә, йылға буйына ултырғандан һуң иң элек уның хыялына Ағиҙелгә күпер һалдырыу эше килә. Телефонды алып, проект бюроһына илле миллион һумлыҡ күпер һалдырыуға проект төҙөргә ҡуша.

— Ул күпер шундай булһын, — ти ул, — тимерҙән, шундай матур итеп эшләнһен, Европала минең турала һөйләһендәр! Ағиҙел аша троллейбустар, машиналар күҙ асып йомғансы үтеп китһендәр ҙә, ял итә барыусыларҙы минут эсендә Дим буйындағы урманға илтеп төшөрһендәр...

Унан һуң баш инженере Шаргинде саҡырып, проектҡа баһа биреүҙе һорай. Шаргин һушы китеп, маҡтай-маҡтай проектты хуплай. Был ғына ла түгел, уларҙың планында Ағиҙелдең бейек яры өҫтөндәге баҡсала ҙур верандалар һалдырыу, йылан кеүек, уралып-уралып тау башынан Ағиҙелгә төшкән баҫҡыстар, ә ҡая өҫтөндә арғымаҡҡа атланып, ҡылысын күтәреп торған легендар Салауаттың һәйкәлен эшләтеү планлаштырыла. Ул баҡсанан бөтә Дим буйҙары, тағы әллә ҡайһы, тағы әллә ҡайһы ерҙәр күренеп торорға тейеш...

Проект тураһында өлкә газеталарҙа информациялар урынлаштырыу өсөн хәбәрҙәр бирәләр. Уларҙы уҡып, хәҙерге кешенең һүҙе эш булғанлығын аңлаған Өфө халҡы, ҡаланың тарихында тағы ла бер яңылыҡты күрәсәгенә шатлана.

Ләкин йылдар һаман үтә тора. Петровский менән Шаргин ҡабул итеп алған тиҫтәләгән моторлы кәмәләр ҙә, байтаҡ буксир пароходтары ла, Ағиҙелде аша сығыу урындарындағы һәр береһендә булған әсәр-дүрттәр паромдар ҙа, күпер һалыу өсөн хеҙмәт иткән, йөҙләгән, плашкоуттар ҙа туҙып, береһе лә ҡалмай, эштән сығалар. Ағиҙел аша сығыр өсөн машиналар, аттар, меңләгән кешеләр 4—6 сәғәт нәүбәт көтәләр. Йәйәүлеләр паром көтөп, бөтә көндәрен бушҡа үткәрмәҫ өсөн, үҙҙәренең хеҙмәт түгеп тапҡан һумдарын биреп, кәмәләргә ултыралар һәм йыш ҡына ҡайһы берҙәре һыуға баталар.

Ниндәйҙер, хыялый, күпер һалыу уйҙары менән шөғөлләнгән, күпер проектың төҙөүгә миллион һумдар талаф иткән хужалар, ысын күпер һалыу эшен, хан заманында булған юл менән эшләргә, сывайҙы, лебетка ҡуйып ҡаҡтырыу урынына, туҡмаҡ менән ҡаҡтырырға юл ҡуйғандар. Пароходтарҙы үткәреү өсөн күперҙе асыу һәм ябыу эшенә электр моторы ҡуйып эшләтеү урынына, арҡан менән тәркөм кешенән тарттырып эшләтеү дауам итә.

— Ағиҙел аша сығыу проблемаһы нисек хәл ителә? — тигән беҙҙең һорауға, коммуналь хужалыҡтың баш инженере Шаргин:

— Бар ине ваҡыт, һәр бер переправала өсәр паром, моторлы унар кәмә, теләгән һандағы буксир пароходтары, яҡшы плашкоуттар, ә хәҙер — улар туҙҙы һәм быйыл утилға тапшырылды!.. Беҙ хәҙер күперһеҙ, паромһыҙ ҡалдыҡ. Судоверфейный заводтар «бәләкәй» — тип заказды ҡабул итмәйҙәр, үҙебеҙ эшләй алмайбыҙ! — ти.

Өфө ҡалаһының хеҙмәтсәндәрен тағы ла күпме ваҡыттар Манилов алымы менән йыуатыу мөмкин булыр икән?

Рахман Кәли.
М. Кәримов.
С. Мәүлютов.

„Беҙҙең республикала"

Поматау умартасылыҡ техникумы бик матур ергә урынлашҡан. Бында бөтә РСФСР ... лыҡтары өсөн умартасылыҡ специалистәре әҙерләнә.

Һүрәттә: техникумдың уҡыу бүлеге мөдире А. В. Табанов, II курс отличниге студент З. ... малов иптәштәр умарталыҡта бал ҡорто семьяһын ҡарайҙар.

А. Калашников һәм А. Ириков фотоһы.

Ауыл советы телефонлаштырыла

Федоровка районы Иҫке Михайловка ауыл Советенең ошо көнгә тиклем район үҙәге менән телефон бәйләнеше юҡ ине. Был ауыл Советенә биш колхоз ҡарай. Хәҙер ошо арағa телефон линияһы үткәреү эше башланды. Иптәш Хисмәт Ниғмәтуллин етәкселек иткән Батыр ауылы йәштәр бригадаһы ике көн эсендә 10 километр арағa 100-гә яҡын бағана ултыртты һәм линия үткәрҙеләр.

Был телефон бәйләнеше ауыл Советенең һәм колхоздарҙың район менән бәйләнешен яҡшыртасаҡ.

Алдынғы команда

Өфө йөк ташыу һәм һал ағыҙыу конторағы управлениеһе июнь айының 20 көнө эсендә Өфөгә 26 мең кубометр ағас ташыны.

Стрельников, Литвинов һәм Бикбов иптәштәр етәкселек иткән катерҙәр командаһы һалдарҙы катерға тағып килтереүҙең айлыҡ планын ике декадала тамамланылар. Бынан башҡа улар күп кенә яғыулыҡҡа һәм майлау материалына экономия яһанылар.

Балаларҙың йәйге ялы

Ҡариҙел йылғаһының матур урынында, Красный ключ ауылында урман һәм һал ағыҙыу эшселәре өлкә союзының пионерҙар лагере асылды. Бында бөтәһе 130 бала ял итә.

Балалар бында ваҡытты күңелле үткәрәләр. Үҫемлектәр түнәрәктәре эшләй. Уйындар ойошторола. Ҙурыраҡ йәштәге балалар үҫемлектәр һәм бөжәктәр коллекцияһы йыйнайҙар. Балалар һәр көндө һыу инәләр, ҡояшта ҡыҙыналар.

Икенсе лагер Белорет районы Зигаза ауылында асылған. Бында 96 бала ял итә.

Йәй буйына Башҡортостан урман промышленносе предприятиеләре эшселәре һәм хеҙмәткәрҙәренең бөтәһе 400 балаһы ял итәсәк.

Ял йорто эшкә башланы

БАЙМАҠ. Райондың ял йорто быйыл үҙенең эшен, үҙған йылға ҡарағанда, 25 көнгә алда башланы. Сезон башланғандан бирле бында 250 кеше ял итте ла инде.

Ағымдағы йылда ял йортонда өс яңы корпус төҙөү планлаштырылған. Быны өсөн хөкүмәт 295 мең һум аҡса бүлде.

Теоретик лекциялар

Башҡортостан өлкә партия мәктәбендә государство экзамендәренә әҙерлек башланды. Көндөҙ һәм кис аудиторияларҙа ныҡышмалы уҡыу бара. Слушателдәр өсөн консультациялар һәм теоретик лекциялар уҙғарыла.

Колхозда ярдамсы предприятиелар

ИӘРМӘКӘЙ. «Яңы ...» колхозында күптән түгел ... та ярыу заводы эшләй башланы. Завод аҙ ғына ваҡыт ... колхоздың хужалыҡ тә... өсөн стерлек таҡта эшләп ... ғарҙы ла инде. Колхоз ... теткес машинаһы йыл ... мең һумға яҡын доход б...

Колхоз быуаһы

БОЗАЯЗ. «Үрнәк» ауыл ... лығы артеле члендәре ҙур ... мохтаж инеләр. Колхозсылар ... маҡсат өсөп кес кенә Бозаяз ... ғаһына быуа яһанылар. ... колхозда 3 гектар майҙан ... ғында ҙур күл барлыҡҡа ... Был быуала балыҡтар ... теләсәк.

Яңы клубтар

Ғафури районы «Ҡыҙыл ...» колхозы 200 урынлы яңы клуб ... ҙәй. Клубта ҙур сәхнә, уҡ..., ка-шахмат, бильярд ... өсөн бүлмәләр эшләнә. Х... хоздың иң һәләтле балта ... ры төҙөү эштәре ... Октябрь... 31 ... «Ильич лампочкалары» ... саҡ.

«Йондоҙ» колхозында ... дай уҡ ҙур клуб төҙөлә. ... рәһендә парк яһау ... рылды.

Райондың «Үҙә», Фрунзе ... мендәге һәм башҡа колхоз... да ла клубтарға капитал ... үткәрәләр.

Йәғфәр Ға...

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАН...

КУШНАРЕНКО ЕМЕШ-ЙӘШЕЛСӘ ТЕХНИКУМЫ

1948—49 уҡыу йылына

УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ.

Техникум емеш-йәшелсә үҫтереү буйынса урта квалификациялы агрономдар әҙерләй.

Уҡыу срогы 3 йыл.

Техникумға 7 класс күләмендә белеме булған һәм ҡабул итеү экзамендәрен уңышлы тапшырған, 14—30 йәштәге һәр ике енес граждандары ҡабул ителә.

Ҡабул ителеүселәр рус теленән һәм әҙәбиәтенән (телдән һәм яҙма), СССР Конституцияһынан, математиканан (телдән һәм яҙма) экзамен бирәләр.

1947 һәм 1948 йылда 7 классты отличник аттестаты менән тамамлаусылар техникумға экзаменһеҙ ҡабул ителәләр.

Ҡабул итеү экзамендәре августың 1-нән алып 20-һенә тиклем үткәрелә. Ғаризалар ҡабул итеү 1 августҡа тиклем.

Ғаризаға түбәндәге документтар: белем тураһында танытма (подлинниктә), йәше тураһында танытма (подлинниктә), автобиография, 3 фотокарточка, һаулыҡ тураһында врач справкаһы беркетелә.

1947—1948 йылдарҙа 10 класты тамамлаусылар II курсҡа экзаменһеҙ ҡабул ителәләр, ләкин улар беренсе ярты йыллыҡта I курста үтелгән махсус фәндәр: ботаниканан һәм дөйөм игенселектән экзамен бирергә тейештәр.

Техникум эргәһендә столовой бар. Райондарҙан килеүселәр дөйөм торлаҡ һәм постель әйберҙәре менән тәьмин ителәләр.

Техникумдың адресе: Башҡорт АССР-ы Кушнаренко ауылы, емеш-йәшелсә ауыл хужалығы техникумы.

ДИРЕКЦИЯ.

ӨФӨ СТАТИСТИКА ТЕХНИКУМЫ

1948—1949 уҡыу йылына

УҠЫУСЫЛАР ҠАБУЛ ИТӘ.

I курсҡа 7—8 класс күләмендә, II курсҡа — 10 класс күләмендә белеме булған һәм өсөнсө — тиҙләтелгән курсҡа 10 класты өлгөргәнлек аттестаты менән тамамлаусы кешеләр ҡабул ителәләр.

Техникумдың адресе: Өфө ҡалаһы, Пушкин урамы, 100-сө номерле йорт. Телефон номере 2—81—07.

Дирекция.

Белдереү

1948 йылдың 28 июнендә ... лимдәр йортонда (Карл ... урамы, 6-сы номерле йорт) ... тик һәм фәнни белемдәр т... буйынса Бөтә Союз обще... ның башҡорт бүлегенең ... роу йыйылышы була.

Көн тәртибе:

1. Ойоштороу комитеты... тураһында отчет

2. Общественың правл... һайлау

3. Ревизия комиссияһы ...

Йыйылышҡа действит... члендар, члендәр-соревнова... действительный члендәр... тивтәрҙән һәм общественный ... маларҙан вәкилдәр саҡыры...

Саҡырыу билеттарын ой... ның ойоштороу комитеты ... лимдәр йортонда, Карл ... урамы, 6-сы номерле йорт) ... мөмкин.

Ойоштороу ком...

Өфө ҡалаһы Башҡорт... ебәкселек станцияһының ... номерле корпусының ... квартираһында тороусы ... данка Цәймарданова ... Мардан ҡыҙы, хәҙерге ... тормала ултырған, гр... Шнгаев Нәзип Рахим ... нән айырылышыу тура... эш ҡуҙғата.

Эш Башҡорт АССР ... ховный судында ...

Редакция адресы: Өфө ҡалаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2—83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2—78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2—80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 9—86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2—72-26.

Ц 00196

Өлкә газета-журналдар типографияһы.

Тиражы 143...

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

Ҡыҙыл Башҡортостан

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө ҡала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Совете һәм хеҙмәтсәндәр депутаттарының Өфө ҡала Советы органы.

23-сө йыл сыға

1948 йыл
№ 128
29
июнь
шишәмбе

хаҡы 20 тин

БӨГӨНГӨ НОМЕРҘӘ:

Советтәр Союзында. (1-се бит).
Нефть сығарыуҙы көндән-көн арттырырға. (1-се бит).
КОМСОМОЛ ТОРМОШО. Ф. Мостаева. — Юғары урожай өсөн көрәштә ауыл комсомолы. (2-се бит).
С. Куватов. — Газеталарҙың күләмен экономлы файҙаланырға. (2-се бит).
В. М. Молотовтың һәм һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре кәңәшмәһендә ҡатнашыусы башҡа вәкилдәрҙең Варшаванан китеүе. (2-се бит).
В. Шнеер.—Эре промышленносте национализациялау тураһында Совнарком декретенең 30 йыллығы. (2-се бит).
З. Изгин. — Политика, фән һәм әҙәбиәт өлгәшеүҙәре хаҡында. (3-сө бит).
Яңы урожайҙың игенен ҡабул итеүгә бөтә элеваторҙарҙы, складтарҙы алдан әҙерләргә! (3-сө бит).
Беҙҙең республикала. (4-се бит).
Удар айлыкта республикалағы юлдарҙы, күперҙәрҙе тулы тәртипкә килтерергә! (4-се бит).
Сит илдәрҙән телеграммалар. (4-се бит).

Тыуған илебеҙгә күберәк металл бирәйек!

Халыҡ хужалығын артабан үҫтереү һәм үҫтереүҙең сталинсе бөйөк программаһын уңышлы үтәү өсөн металл етештереүҙе арттырғандан-арттыра барыу кәрәк ителәә. Белорет металлургтары был бурысты үтәү өсөн көрәштә байтаҡ уңыштарға өлгәштеләр. Комбинат бер нисә йыл буйына артта ҡалып килеүен бөтөрөп, үткән йыл металлургияның бөтә циклы буйынса планды арттырып үтәне. Үҙенең йәшәү осоронда беренсе тапҡыр булараҡ металлургия заводы үткән йыл валовой продукция етештереүҙең иң юғары кимәленә өлгәште. Металлургия, ҡорос-сыбыҡ, листопрокат заводтары төп продукция етештереүҙе ҡышлыҡтың һуңғы йылына иғлан иткән кимәлдә эшләйҙәр.

Өлгәшелгән уңыштарҙа социалистик ярыштың киң йәйелдереү, эске мөмкинлектәрҙе файҙаланыу, ҙә техник саралар планы эшләү һәм уны тормошҡа ашырыу, хеҙмәтте күп талап иткән эштәрҙе механизациялаштырыу һәм башҡалар ҙур роль уйнаны.

Ләкин был металлургтар тулы мәғәнәһендә яҡшы эшләйҙәр, бөтә мөмкинлектәрҙе лә файҙаланалар тигән һүҙ түгел. Әле йыл әйләнәһенә тигеҙ ритм менән эшләү тәьмин ителмәгән. Һөҙөмтәлә пландар йәйге айҙарҙа үтәлһә лә ҡышҡы айҙарҙа үтәлеп еткерелмәй. Быйыл да шундай уҡ хәл ҡабатланды. Беренсе кварталда металлургия комбинаты предприятиелары лә, ҡорос-сыбыҡ заводы ла Тыуған ил алдында ҙур бурыслы булып ҡалдылар.

Комбинат етәкселәре беренсе кварталда планды үтәп еткермәүҙе, элекке кеүек, Белорет тар тимер юлының насар эшләүенә һылтайҙар.

Ләкин пландарҙың үтәлеп еткерелмәүе бер тимер юлдың насар эшләүендә генә түгел. Әшкә комасаулаған башҡа серьез етешһеҙлектәр ҙә күп. Мартен цехында мейескә йыш ҡына шихтаны сортировкаһан үткәрмәйенсә бирәләр. Норма буйынса мейескә шихта тултырыу ике-өс сәғәттә тамамланырға тейеш. Ә ул йыш ҡына дүрт-биш сәғәткә һәм унан да оҙағыраҡҡа һуҙыла. Һөҙөмтәлә мейескә ҡыҙыуына һәм ҡорос иретеү 15 сәғәткә тиклем һуҙыла. Былар ҡорос иретеү технологияһын боҙоуға, брак эшләүгә килтерә. Ошолар арҡаһында цех беренсе кварталда мең тоннаға яҡын металл юғалтты.

Сталеварҙар Хлесткин, Шәрәфетдинов һәм башҡа иптәштәр үткән йыл тиҙләтелгән метод ҡулланып, ҡорос нормаһы буйынса билдәләнгән 11 сәғәт урынына алты сәғәттә иретеүгә өлгәшкәйнеләр. Ләкин был инициатива цех һәм комбинат етәкселәре тарафынан күтәрелеп алынманы. Үткән йылдан бирле тиҙләтелгән метод менән ҡорос иретеү ҡулланылғаны юҡ. Ялҡынлыҡты күрә белмәгән урындарҙа ҡына ошондай гүзәл башланғыстың баҫылып ҡалыныуы мөмкин.

Эшкә ҡомасаулаған, металлургтарҙың уңыштарын кесерәйткән бындай серьеҙ етешһеҙлектәр башҡа цехтарҙа һәм предприятиеларҙа ла бар. Домна, прокат цехтарында, Тирлән лестопрокат заводында руда, металл, яғыулыҡ, электр энергияһын, огнеупорҙы норманан артыҡ расходлау бөтөрөлгәне юҡ әле. Һөҙөмтәлә металдың үҙенә төшөү хаҡы күтәрелә, государствонан дотация алыу күләме ҙурая. Комбинатта бөтә эшселәрҙең биштән бер өлөшө норманы үтәп еткермәй. Былар экономия, хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәреү өлкәһендә файҙаланылмаған күп резервтәр барлығы тураһында һөйләйҙәр. Уларҙы хәрәкәткә килтерергә кәрәк. Һәр бер металлург, ул етәксеме йәки ябай эшсеме, экономия режиме өсөн көрәште, планды йәки норманы үтәү, илебеҙгә күберәк металл биреү өсөн намыҫлы хеҙмәт һалыуҙы үҙенең изге бурысы итеп аңларға һәм был бурысты үтәүҙә үҙендә яуаплылыҡ һиҙергә тейеш. Стахановсыларҙың иптәштәрсә ярҙамын, производствола уҡытыу-өйрәтеү, алдынғы тәжрибәләрҙе пропагандалауҙы ойоштороу, хеҙмәтте күп талап иткән процестарҙе механизациялаштырыу юлы менән артта ҡалыусыларҙы алдынғылар кимәленә күтәреүҙә эшлекле саралар күрергә кәрәк.

Әлбиттә, етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүҙә металлургтар тарафынан сара күрелмәй, тип булмай. Күрелгән саралар бер ни тиклем һыҙылышты тәьмин итте. Комбинат һуңғы ике айҙа планды үтәне. Тимер юлда ла эш байтаҡ яҡшырҙы. Ләкин беренсе кварталдағы бурыс ҡапланғаны, ярыш йөкләмәләрен тулыһынса кимәлендә эшләүгә өлгәшелгәне юҡ әле. Ҡорос-сыбыҡ заводында, металлургтарҙың уңышлы эшләүендә мөһим роль уйнарға тейеш булған төҙәлеш-монтаж управлениеһендә эш темпы түбән. Ләкин, металлургтарҙан эш темпын ҡырҡа күтәреү талап ителә.

Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығын лайыҡлы ҡаршыларға! Хәҙер ошо лозунг аҫтында металлургтар арасында байрам хөрмәтенә ярыш йәйелдерелә. Тәүге партия, комсомол, профсоюз ойошмаларының, шулай уҡ партияның Белорет ҡала комитетының бурысы ярыш менән бөтә металлургтарҙы солғап алыу, ярыштың массалыҡ ижади активлеген, көстө һәм эске резервтарҙе ташлап, ярышта ҡалған етешһеҙлектәрҙе бөтөрөүгә, илебеҙгә күберәк һәм яҡшы сифатлы металл бирергә, промышленность тармаҡтарынан береһе булған ҡара металлургия предприятиеларенең бөтә ил әйләнәһенә тигеҙ ритм, график менән эшләүе, рентабеллеге өсөн ныҡлы база булдырып, биш йыллыҡты дүрт йылда үтәүселәрҙең авангардында барыу тәьмин итеү ярышта уҙаҡ бурыс булып торорға тейеш.

Германиялағы совет хәрби администрацияһы работниктарын ССР ордендәре һәм медалдәре менән наградлау

СССР Верховный Советы Президиумының 1948 йыл 24 июнь Указы менән, хөкүмәт заданиеләрен уңышлы үтәгәндәре өсөн Германиялағы совет хәрби администрация работниктарының ҙур төркөмө СССР ордендәре һәм медалдәре менән наградланды.

Ленин ордене менән наградландылар: генерал-лейтенант Михаил Иванович Дратвин, генерал-майор Дмитрий Георгиевич Дубровский, инженер-техник хеҙмәте генерал-майоры Леонид Иванович Зорин, Константин Иванович Ковань, генерал-лейтенант Николай Кузмич Ковальчук, генерал-майор Иван Сазонович Колесниченко, генерал-майор Александр Григорьевич Котиков, Николай Афанасьевич Кривошеев, генерал-лейтенант Василий Ельянович Макаров, Владимир Семенович Семенов, Советтәр Союзы Маршалы Василий Данилович Соколовский.

Хеҙмәт Ҡыҙыл Байрағы ордене менән 7 кеше наградланды.

Ҡыҙыл Йондоҙ ордене менән — 113 кеше;

«Почет билдәһе» ордене менән — 13 кеше;

«Батырлыҡ өсөн» медале менән — 5 кеше;

«Хеҙмәттә батырлыҡ өсөн» медале менән — 342 кеше;

«Боевой хеҙмәттәре өсөн» медале менән — 163 кеше;

«Хеҙмәттә айырыуса батырлыҡ күрһәткән өсөн» медале менән — 8 кеше наградланды.

Иген һаҡлау өсөн стандарт складтар

«Станиславлеспром» тресының (Украина) ағас эшкәртеү предприятиелары иген һаҡлау өсөн стандарт склад эшләүҙе үҙләштерҙеләр. Хәҙер беренсе 10 склад эшләнде. Улар үҙҙәренең конструкцияһы яғынан бик ябай. Был складтарҙы йыйнау өсөн 3540 сәғәт ваҡыт талап ителә.

Яңы урожай йыйнау башланғанға тиклем был предприятиелар 50 склад эшләп сығарасаҡтар.

(ТАСС).

Советтәр Союзында

Көньяҡта урожай йыйнау

КРАСНОДАР. (ТАСС). Кубанда ямғырҙар яуып уҙғандан һуң ҡоро, эҫе көндәр башланды. Был ужым ашлыҡтарының ғына түгел, бәлки башҡа культураларҙың да өлгөрөүен тиҙләтте. Баҫыуҙарҙа 10 меңгә яҡын ашлыҡ сабыусылар, 500-ҙән артыҡ ураҡсылар, 100-ләгән комбайндар эшләйҙәр.

Выселковский районының Чапаев исемендәге колхоз правлениеһе 100-ҙән артыҡ кешене икенсе дәрәжәләге эштәрҙән бушатып, баҫыуға 350 ашлыҡ сабыусы сығарҙы. Улар комбайндар менән урыу башланғанға тиклем 500 гектар ерҙең ашлығын саптылар.

Крайҙың алдынғы колхоздары ҡул менән сабылған ашлыҡтарҙы шунда уҡ һуғып, игенде государствоға тапшыралар. Белореченск, Курганск, Тимашев һәм башҡа райондарҙа яңы урожай игене тейәлгән беренсе автомашиналар һәм ылауҙар элеваторға оҙатылдылар.

* * *

КУЛЯБ. (Таджик ССР-ы). (ТАСС). Былый үткән көслө ямғырҙар сәсеүлектәргә яҡшы тәьҫир итте. Өлкәнең колхоздары арпа йыйнай башланылар. Урожай уҙған йылғынан байтаҡ юғары. Пархарск, Дангаринск һәм Шуроабад райондарының ауыл хужалығы артелдәре һәр бер гектарҙан 20-шәр центнерҙан артыҡ иген һуғып алдылар. Айырым колхоздар гектарынан 20—28-әр центнер арпа йыйнайҙар.

Дангарин районында иртә сәселгән ужым ашлыҡтары участкаларында көҙгө бойҙай йыйнау башланды.



Төрөкмәнстан ССР-ы. Бында рәттән государствоға массовый ла башланды. Яңы урожай игене урожай йыйнау эштәре менән бер юлы иген тапшырыу эштәре тейәлгән ылауҙар әҙерләү пункттарына ағылалар.

Һүрәттә: Колхоздарҙың яңы урожай игене тейәлгән автомашиналары Геок-Тепе районының әҙерләү пунктында.

К. Темашевский фотоһы. (ТАСС фотохроникаһы).

Колхоздар—политик һәм фәнни белемдәр таратыу обществоларының члендәре

Төрөкмәнстандың Ташауыз өлкәһенең «Большевик», «8 Март» һәм Тельман исемендәге колхоздарының алдынғы мамыҡсылары уҙған йылда гектарынан 90—100-әр центнер мамыҡ йыйнап алғайнылар. Юғары урожай йыйнап алғаны өсөн был артелдәрҙең 10 колхозсыһына Социалистик Хеҙмәт Геройы исеме бирелде; күп колхозсылар ордендәр һәм медалдәр менән наградландылар.

«Большевик», «8 Март» һәм Тельман исемендәге колхоздар күптән түгел Төрөкмән ССР-ҙың политик һәм фәнни белемдәр таратыу обществоһының коллектив члене итеп ҡабул ителделәр. Мамыҡ үҫтереү мастерҙары общество тарафынан докладтар һәм лекциялар уҡыуға ылыҡтырыласаҡтар.

(ТАСС).

Сөгөлдөр плантацияларында самолеттар

КИЕВ. (ТАСС). Украинаның граждандар аэрофлотының авиацияһы сөгөлдөр сәсеүлектәрендәге ҡорткостарға ҡаршы уңышлы рәүештә көрәш алып бара. Пилоттар бик түбән осоп плантацияларға ағыулы химикаттар менән һиптерәләр.

УССР-ҙың граждандар аэрофлоты управлениеһендә, ТАСС хәбәрсеһенә булған белдереүҙәргә ҡарағанда, авиахимик средстволар менән 400 мең самаһы гектар ер эшкәртелде. Был, уҙған йылға ҡарағанда, 50 мең гектарға артыҡ, тигән һүҙ.

Ай аҙағында авиахимик методтар менән тағы ла 150 мең гектар сөгөлдөр сәсеүлеге эшкәртеләсәк.

Балалар йорттары өсөн ер участкалары

Хеҙмәткә өйрәтеүҙе ойоштороу һәм ярҙамсы хужалыҡтарҙы үҫтереү өсөн, ауылдарҙа һәм эшселәр поселкаларында урынлашҡан балалар йорттарына ер участкалары бүленә. Был участкаларҙа емеш-сәләк баҡсалары, парник хужалыҡтары, уйын майҙандары буласаҡ.

Белоруссияла бесән сабыу

МИНСК. Белоруссияла бесән сабыуҙың иң ҡыҙыу ваҡыты. Беренсе унар меңләгән гектар майҙандағы үлән сабылды ла инде. Көньяҡ райондарҙың бөтә урындарында кәбән ҡойоу, хөкүмәткә бесән тапшырыу эштәре башланды.

Нефть сығарыуҙы көндән-көн арттырырға

Нефтселәр ярышы

Башҡортостан нефтселәре 1948 йылға планды срогынан алда үтәү өсөн Куйбышев өлкәһе нефтселәре менән социалистик ярышҡа ҡушылалар.

Ошо көндәрҙә Ленин орденле «Туймазынефть» тресы промыселдәрендә, предприятиеларендә һәм буровойҙарында нефтселәрҙең күп кеше ҡатнашлығындағы йыйылыштары булып үтте. Нефтселәр үҙҙәренең Октябрь алды социалистик ярышында алған йөкләмәләрен һәм уларҙы үтәү өсөн көрәш юлдарын тикшерҙеләр. Трестың бөтә коллективе Куйбышев өлкәһе нефтселәре менән социалистик ярышҡа сығырға ҡарар итте.

Трестың эксплоатационниктәре «Ставропольнефть» тресы коллективен социалистик ярышҡа саҡырып, нефть сығарыуҙың йыллыҡ программаһын 21 декабргә үтәргә, илгә пландан тыш бер нисә мең тонна нефть бирергә, нефттең үҙенә төшөү хаҡын 5 процентка кәметергә йөкләмә алдылар. Бораулаусылар эксплоатацион бораулауҙың тиҙлеген 10 процентка, разведка бораулауының тиҙлеген 5 процентка күтәрергә ҡарар иттеләр.

Төҙөүселәр ҙә юғары йөкләмәләр алалар. Был йөкләмәләр буйынса 10 октябргә тиклем, хужалыҡ юлы менән, 1900 квадрат метр торлаҡ төҙөп эксплоатацияға бирергә булдылар.

Ишембай нефтселәре «Кинельнефть» тресы коллективенең саҡырыуына ҡушылып, шулай уҡ ҙур йөкләмәләр алды.

Нефть берекмәләренән, трестарынан башҡа ярышҡа айырым промыселдәр, буровойҙар ҡушылалар. «Ставропольнефть» тресының бораулау контораһы «Туймазынефттең» 2-се номерлы бораулау контораһы менән ярышҡа ҡушылды.

Октябрь алды ярышы башланыу уңайы менән Башҡортостанға Куйбышев өлкәһе нефтселәренең делегацияһы килде. Делегация Ишембайҙа, Октябрьскиҙа, разведка партияларында эшселәрҙең йыйылыштарында ҡатнашып, Куйбышев нефтселәренең эштәре, йөкләмәләре менән таныштырҙы, республикабыҙҙың алдынғы промыселдәре һәм буровойҙарының эш тәжрибәләре менән танышты.

Тиҙҙән Башҡортостан нефтселәре Куйбышев өлкәһе нефть райондарына делегация ебәрәсәктәр.

Х. Рафиков.

Бораулаусылар темпты күтәрәләр

ОКТЯБРЬСК. Икенсе номерлы бораулау контораһы бер нисә ай буйына проходка планын үтәй алмай килде. Октябрь революцияһының 31 йыллығы хөрмәтенә бригадалар араһында йәйелдерелгән ярыш артта ҡалыуҙы бөтөрөүҙә ныҡлы йөгөнтө яһаны. Һуңғы көндәрҙә контора проходка планын 7—35 процентка арттырып үтәй.

Мастерҙар Тарасов, Фролов, Степанов һәм башҡаларҙың бригадалары ярышта айырыуса яҡшы күрһәткестәргә өлгәшәләр.

Мастер иптәш Тарасов бригадаһы июнда 600 метр бораулауға йөкләмә алғайны. Ул йөкләмәһен 20 көндә үтәне.

Мастер иптәш Степанов бригадаһы 291-се номерлы скважинала бораулау эшен срогынан 60 көнгә элек тамамланы. Бригада яңы — 166-сы номерлы скважинала ла уңышлы эшләй. 12 көн эсендә 560 метр бораулланды. Тимәк, бригада станок-айға мең метрҙан юғарыраҡ тиҙлектә бораулай.

Шулай уҡ мастер иптәш Фролов бригадаһы ла юғары темп менән эшләй. Ул айлыҡ проходка заданиеһен ике декадала үтәне.

И. Болдогоев.

Йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә нефть

Ленин орденле «Туймазынефть» тресының беренсе промысел коллективе һуғыштан һуңғы биш йыллыҡтың хәл иткес йылы планын үтәүҙә арымай-талмай көрәшеп, яҡшы уңыштарға өлгәшә. Промысел нефть сығарыуҙа йылдың тәүге яртыһы планын треста беренсе булып үтәне һәм июндең ҡалған алты көнөндә йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә нефть сығара.

Нефть өсөн көрәштә мастерҙар Синявский һәм Казаченко иптәштәр етәкселек иткән участкалар айырыуса өлгө күрһәтәләр. Улар ярты йыллыҡ нефть сығарыу планын срогынан 15 көн алда үтәнеләр.

Хәҙер йылдың икенсе яртыһында ла алдынғы сафта булыу өсөн промыселдең бригадалары араһында Бөйөк Октябрҙең 31 йыллығы хөрмәтенә ярыш киң йәйелдерелде.

Күптән түгел, СССР Верховный Советы Президиумы Указы менән Башҡортостандың алдынғы нефтселәре Советтәр Союзы ордендәре һәм медалдәре менән наградланғайнылар. 26 июнда ҙур группа нефтселәргә хөкүмәт наградалары тапшырылды.

Һүрәттә: Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводының орден һәм медаль алыусы нефть эшкәртеүселәре (һулдан уңға) — 1. Н. Н. Казанцев, 2. Ф. А. Звягин, 3. И. М. Абрамов, 4. Б. М. Ежов, 5. М. И. Мазор, 6. Е. Е. Ивченко, 7. А. Г. Михайлова, 8. А. И. Ульянов, 9. О. В. Стародубцева, 10. И. Г. Першин иптәштәр.

В. Жданов фотоһы.

Комсомол тормошо

Юғары урожай өсөн көрәштә ауыл комсомолы

Быйыл ауыл комсомолецтәре яҙғы сәсеүҙе уңышлы үткәреүҙә партия ойошмаларына ҙур ярҙам күрһәттеләр. Комсомолецтәр яҙғы сәсеүҙең иң яуаплы участкаларында булдылар. Уларҙан 9 меңдән артыҡ кеше һабансы, 7800 кеше тырмасы һәм 6 мең кеше сәсеүсе булып эшләне. Республикала 300 комсомолец-йәштәр бригадаһы, 1520 звено яҙғы сәсеүҙе ҡыҫҡа срокта һәм юғары агротехник кимәлдә үткәреү өсөн фиҙакәр көрәш алып барҙы.

Комсомол ойошмаларының күпселеге, ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы ҡарарын тормошҡа ашырыу өсөн актив көрәшеп, йәштәр араһында эшләүҙең ҙур тәжрибәһен тупланы, социалистик ярыш менән эшләкле етәкселек итеүгә өйрәнде. Яңауыл, Туймазы, Бөрө, Борай һәм Салауат райондарындағы комсомол ойошмаларының миҫалы быны асыҡ күрһәтә. Яҙғы сәсеү осоронда Яңауыл районының 1200 комсомолесе баҫыуҙа эшләп, гүзәл өлгө күрһәтте. «Урал» колхозында 19 комсомолец һабансы, тырмасы, сәсеүсе булып эшләне. Комсомолецтәрҙән Хафизов Муллағаян, Хәсбиев Ғата көнгә 0,5 гектар урынына 0,75 гектар ер һөрҙө. Шамсиев, Гәрәев, Мукаиов иптәштәр сеялка менән норма буйынса 4 гектар урынына 7 — 8 гектар ашлыҡ сәстеләр. Ә комсомолец иптәш Вахитов систематик рәүештә көнгә 9-ар гектар сәсеүгә өлгәште. Комсомолка Сафина Асняның звеноһы үҙ участкаһында сәсеүҙе 4 эш көнөндә тамамланы. «Урал» колхозының комсомолецтәре агитацион-массовый эште ойоштороуҙа партия ойошмаһының яҡын ярҙамсыһы булдылар.

Яңауыл районында 51 комсомолец-йәштәр звеноһы юғары урожай өсөн көрәш алып бара. Улар яҙғы сәсеүҙе өлгәлә тамамланылар. Хәҙер сәсеүлектәрҙе хәстәрлек менән тәрбиәләйҙәр. Яңауыл районы комсомол ойошмаһының эше күптәргә өлгө булып тора.

Хәҙер комсомол ойошмаларының бурысы яҙғы сәсеү осоронда яулап алынған уңыштарҙы ауыл хужалығы йылының алдағы осоронда ла нығытыуҙан тора.

ВЛКСМ-дың Ҡыйғы, Туймазы һәм башҡа ҡайһы бер райкомдары пленумдар һәм комсомол активының йыйылыштарын үткәреп, сәсеү осоронда комсомол ойошмаларының эштәренә йомғаҡ яһаныла, булған етешһеҙлектәрҙе астылар һәм сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү, урожай йыйнауға әҙерлек эшендә комсомол ойошмаларының конкрет бурыстарын билдәләнеләр.

Ләкин ВЛКСМ-дың айырым район комитеттәре комсомолецтәрҙе һәм союздан тыш йәштәрҙе юғары урожай өсөн көрәшкә йәлеп итеү буйынса йомшаҡ эшләйҙәр әле. Былдайҙар иҫәбенә, беренсе нәүбәттә, ВЛКСМ-дың Краснокам райкомы инә. Был райком һәм уның секретаре иптәш Ғизетдинов йәштәрҙең социалистик ярышына етәкселек итмәй, аҙ һанлы һәм яңы төҙөлгән комсомол ойошмаларын нығытыу менән шөғөлләнмәй. Ә 19 колхозда комсомол ойошмаһы бөтөнләй юҡ. Оло-Тиләк, Ҡалтасы, Аҫҡын райкомдарының эшендә лә шулай уҡ етешһеҙлектәр бар.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү комсомол ойошмаларының бик мөһим эше булып тора. Сөнки юғары урожайҙың яҙмышы шуға бәйләнгән. Ҡырмыҫҡалы район комсомолецтәренең өлгөһө был яҡтан маҡтауға лайыҡлы. Улар Социалистик Хеҙмәт Геройы Банат Батыровҙың тәжрибәһен ентекләп өйрәнәләр һәм уны практик эштәрендә ҡулланалар. Районда булған 33 комсомолец-йәштәр звеноһы үҙ участкаларында утауҙы тамамланылар һәм сәсеүлектәргә өҫтәмә аҙыҡландырыу үткәрҙеләр. «Динамо» колхозында иптәш Мәхмүтованың, һәм Чапаев исемендәге колхозда иптәш Огородникованың звеноһы сәсеүлектәрҙе айырыуса хәстәрлек менән тәрбиәләй. Ҡырмыҫҡалы районының бөтә йәштәре һәм уҡыусы балалар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эшенә йәлеп ителгән.

Урожай йыйнауға әҙерлектә комсомол ойошмалары бик ҙур эш башҡара алалар. Комсомолецтәр комбайндарҙы һәм башҡа урып-йыйнау машиналарын ремонтлауҙа, ятмалы ырҙындар әҙерләүҙә актив ҡатнашырға, үҙ арттарынан союздан тыш йәштәрҙе эйәртеп барырға тейештәр.

Сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү һәм урожай йыйнауға әҙерлек эштәрендә комсомолецтәрҙең актив ҡатнашыуына өлгәшеү комсомол ойошмаларының беренсе нәүбәттәге бурысы булып тора. Бының өсөн комсомол кесон эштең мөһим участкаларына дөрөҫ урынлаштырырға, йәштәр араһында тәрбиә эштәрен ҡырҡа яҡшыртырға кәрәк.

Комсомолецтәрҙең һәм союздан тыш йәштәрҙең бөтә энергияһын урожай өсөн көрәшкә йүнәлдерергә кәрәк. Шул ваҡытта ғына Башҡортостан комсомолы иптәш Сталинға яҙған хатта алынған ҙур һәм яуаплы йөкләмәләрҙе үтәү эшенә достойн вклад индерә алыр.

Ф. Мостаева,

ВЛКСМ Өлкә Комитетының крәстиән йәштәре бүлеге мөдире.

Газеталарҙың күләмен экономлы файҙаланырға

Район газеталарының форматы бәләкәй булыуы, бигерәк тә уларҙың һирәк — аҙнаға бер тапҡыр ғына сығыуы, уларҙың күләмен дөрөҫ һәм экономлы файҙаланыуҙы талап итә.

Был турала һүҙ ҡуҙғатҡанда, бөтәһенән элек, газеталарҙың баштарын, мәҡәләләрҙең заголовкаларын эшләү һәм урынлаштырыу мәсьәләһенә туҡталырға кәрәк.

Миҫалға, Борай районының «Ленин байрағы» газетаһын алайыҡ. Уның исеме ике колонкаға түгел, бәлки биш колонкаға бирелгән. Ошо арҡала, ай һайын газетаның күп кенә юлдары материалдар өсөн файҙаланылмайынса ҡалдырыла. Әгәр ҙә редакция «Ленин байрағы» һүҙҙәрен ике колонкаға ғына бирһә, номер һайын 45 юл башҡа нәмәләр урынлаштырыуға ҡалыр ине.

Бөгөнгә көндә «Ленин байрағы» газетаһының 28 номере сыҡты, тимәк, 1260 юл бушҡа файҙаланылды тигән һүҙ. Был, район газетаһының бер номере.

Ошондай уҡ етешһеҙлектәр — газетаның күләмен экономһыҙ файҙаланыуҙар Аҫҡын районы «Социализм юлы» газетаһында ла бар. Бында, редакция газетаның сыҡҡан көнөн, номерын һәм үҙенең адресын айырым-айырым рамкалар менән биреп, окноны (шпигелде) дөрөҫ файҙаланмай. Оператив материалдарҙың да ваҡытында баҫылмайынса ҡалыуҡна юл ҡуя.

Ә күпселек газеталар был урынға — окноға лозунгылар, партия һәм хөкүмәт ҡарарҙарынан, Үҙәк, өлкә газеталарынан цитаттар йәки социалистик ярыш алдынғылары күрһәткестәрен, район яңылыҡтарын урынлаштырып киләләр. Һәм дөрөҫ эшләйҙәр.

Газетаның күләмен экономлы файҙаланыу өсөн даими рубрикаларҙы клише менән биреүгә ләһыҡ иғтибар итергә кәрәк. Сөнки, уларҙы яҡшы һәм уйлап эшләмәү, дөрөҫ урынлаштырмау газетаның күп кенә юлдарын бушҡа файҙаланыуға килтерә. Мәҫәлән, Миәкә районының «Баҫыу ударниге» газетаһы редакцияһы клише итеп эшләнгән биш төрлө даими рубрика ҡуллана. Уларҙың — «Советтар Союзында» тигән рубрикаһы үҙе генә өс колонканан — 30 юлдан тора. Шулай уҡ, «районыбыҙҙа», «беҙгә яҙалар», «колхоз баҫыуҙарында» тигән рубрикаларҙың да һәр береһе 20—24 юлдан да кәм түгел. Әгәр ҙә былардың бөтәһен дә бергә йыйһаң, бер номерға биргәндә 100 юл, ә уң тапҡыр арттырғанда бер мең юл булып сыға. Был инде газетаның бер номере тигән һүҙ.

Газеталарҙа клишелар биреү кәрәк һәм мөһим эш. Ләкин уларҙы ҡайһы бер редакциялар тейешенсә файҙалана белмәйҙәр. Мәҫәлән, Зиянчура районы «Коммунизм өсөн» газетаһы 1 май көнө сыҡҡан — ике биттән торған номерендә дүрт клише урынлаштырҙы. Был газетаның дүрттән бер өлөшө була.

Редакцияларҙың һүрәттәр файҙаланыу практикаһында иң тар урын — үҙ район тормошонан алынған һүрәттәрҙе ҡулланмау иҫәпләнә. Абзан, Күгәрсен һәм башҡа күп кенә район газеталары район тормошонан алынған бер генә һүрәт тә биргәндәре юҡ.

Район газеталарында таблицалар биреү ҙә мөһим урын тота. Тик уларҙы ыҡсым йыйырға һәм тығыҙ верстать итергә кәрәк. Ҡайһы бер газеталар шулай эшләйҙәр ҙә. 28 майҙа «Коммунизмға» газетаһы (Ҡыйғы районы) 30 юлдан торған таблицала яҙғы сәсеү эштәре буйынса район колхоздары араһындағы социалистик ярыштың барышын күрһәтте. Таблица петит менән йыйылған һәм бик ыҡсым урынлаштырылған. Ләкин ҡайһы бер район газеталары редакциялары таблицаларҙы йыйыуға һәм урынлаштырыуға былай ыҡ иғтибар итмәйҙәр. Благовар районы, «Сталин юлы» газетаһы һуңғы дүрт номерендә генә 700 юллыҡ таблица урынлаштырҙы.

Һөҙөмтә яһап шуны әйтергә кәрәк: редакциялар газеталарҙың күләмең һаҡлыҡ менән файҙаланырға, номерҙарҙы ныҡлы уйлап планлаштырырға, газеталарҙы редакцион, техник яҡтан экономлы оформить итергә тейештәр.

Газетаның күләмен экономлы файҙаланыуға Ленин партияһы матбуғаттың бөтә работниктарын һәр ваҡыт өйрәтте. Беренсе донъя һуғышы ваҡытында Владимир Ильич партияның үҙәк Органын сығара башлағанда, уны техник яҡтан оформить итеүгә ҡарата ошондай күрһәтмәләр бирҙе:

«...Беҙгә ике биткә маҡсимум материал урынлаштырырға кәрәк... Хәҙер бөтә мәсьәлә шунда: ике бит күпме хәреф һыйҙыра алыр? Үҙәк Органдың форматын элеккеса итеп алырға кәрәк (Женевала заголовка юҡ бит! яңы заголовканы экономиялыраҡ итеп эшләргә кәрәк, урын аҙыраҡ китерлек булһын: Мәҫәлән, заголовка мөйөшкә урынлашһын, ә бөтә өс баганаһы алып тормаһын)...

Әгәр Үҙәк Органды ошо формат менән сығарғанда бөтәһен дә петиттан йыйып булһа ине, беҙ ике биткә 40.000 хәреф урынлаштыра алыр инек. Ул ваҡытта тағы ла үҙебеҙҙең әҙерләп иткән ике мәҡәләне урынлаштырып булыр ине». («Большевистик матбуғат материалдары йыйынтығы» 1940 йыл, 444 бит).

Газета эшенә хөрмәт менән ҡарау — редакторҙарҙан газетаның һәр бер юлын һаҡлыҡ менән файҙаланыуҙы талап итә.

С. Ҡуватов,

ВКП(б) Өлкә Комитете пропаганда һәм агитация бүлегенең матбуғат секторы инструкторы.

В. М. Молотовтың һәм һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре кәңәшмәһендә ҡатнашыусы башҡа вәкилдәрҙең Варшаванан китеүе

Варшава аэродромында митинг

ВАРШАВА, 25 июнь. (ТАСС). Бөгөн Мәскәү ваҡыты менән 12 сәғәттә СССР Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотов Варшаванан Мәскәүгә китте.

Аэродромда В. М. Молотовты, шулай уҡ кәңәшмәлә ҡатнашыусы башҡа Сит ил Эштәре Министрҙәрен Польша республикаһының премьер-министре Циранкевич етәкселегендә Польша хөкүмәте вәкилдәре һәм шулай уҡ СССР-ҙың Польшалағы послоһы Лебедев етәкселегендә дипломатик корпус оҙатты.

Митингыны Польша республикаһының премьер-министре Циранкевич асты.

— Бөгөн беҙ Советтар Союзының һәм халыҡ демократияһы илдәренең Варшава кәңәшмәһенә йыйылған Сит ил Эштәре Министрҙәрен оҙатабыҙ.

Варшава кәңәшмәһенең ҡарарҙары тыныслыҡ өсөн, халыҡ-ара йәки [illegible] ... әмәләргә һәләү өсөн көрәш [illegible] булып тора. [illegible] өмтәһендә, немец империализменең һөжүме [illegible] ҡанлы һыуҙар кисергән халыҡтар тауышы булып торалар.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһе [illegible] бөгөн [illegible].

Геройҙар Советтар Союзы халыҡтарының бөйөк юлбашсыһы [illegible] Генералиссимус Сталинға [illegible] Молотов иптәшкә [illegible].

Үҙ һүҙен Циранкевич СССР Министрҙәр Советы Председателе [illegible] Сит ил Эштәре Министре В. М. Молотовҡа бирҙе.

В. М. Молотовтың телмәре

«Варшава граждандары!

Миңә Мәскәү һәм Совет Хөкүмәте исеменән һеҙҙе тәбрик итергә һәм айырыуса һынауҙарҙы үткәргән [illegible] польяк [illegible] бөйөк [illegible] булыуыгыҙҙы белдерергә бик [illegible].

Беҙҙең ике ил араһында дуҫлыҡ һәм үҙ-ара ярҙам тураһында договор төҙөү [illegible] бөйөк Сталиндең әйткән һүҙҙәрен беҙ бөтәбеҙ ҙә хәтерләйбеҙ [illegible] Советтар Союзы менән Польша [illegible] ныҡлы боролош булды. Советтар Союзы менән Польша араһында элекке дуҫтарса булмаған мөнәсәбәттәр урынына союз һәм дуҫлыҡ мөнәсәбәттәре килде [illegible]. Был, әгәр йылдар буйына [illegible] герман агрессияһына [illegible] урыҫ [illegible] ҡаршы [illegible] бик ҙур ауырлыҡтарға [illegible] сыҡҡандан һуң өлгәшелде. Советтар Союзында демократик Польша менән туғандарса мөнәсәбәттәр урынлаштырыу [illegible] Польшаның алдынғы кешеләре [illegible] поляк халҡының уйҙарын һәм [illegible] тоторлоҡ [illegible] бөтә халҡының ҡарата шундай [illegible] мөнәсәбәттә булыуҙары [illegible] ике дуҫтарҙың Польша халҡы [illegible] публикаһының бойондороҡһыҙ [illegible] уның [illegible] атыуының иң яҡшы [illegible] Совет-Польша дуҫлығына [illegible] бик ныҡлы булыуы [illegible].

Германия тураһында [illegible] кил булып үткән Лондон кәңәшмәһе буйынса һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре Варшавалағы кәңәшмәлә төҙеп белдереүҙе бөгөн иғлан ителдеһ белдереүҙә, Европа илдәре, [illegible] дәре башҡарылды.

[illegible] герман халҡы ла, гитлер агрессияһынан [illegible] ҡаҫҡа тейештәр, [illegible] тыныслыҡ [illegible] Польша [illegible] [illegible] беҙҙең Советтар Союзы менән Польша араһындағы [illegible] Советтар [illegible] демократик [illegible] һәм халыҡ [illegible].

[illegible] Польша халҡы — [illegible]!

Йәшәһен Польша [illegible]!

Йәшәһен һәм нығыһын Советтар Союзы менән Польша республикаһы дуҫлығы [illegible]!

Йәшәһен Советтар Союзының һәм халыҡ демократияһы Польша [illegible] бөйөк [illegible] халҡтар дуҫлығы!»

В. М. Молотовты ҙурлап ҡаршы алдылар. Тәбрик итеп [illegible] Польша [illegible] Советтар Союзы менән Польша [illegible] республикаһы [illegible].

Аэродром Варшава кәңәшмәһендә ҡатнашҡан һигеҙ государствоһының государственный флагтары менән биҙәлгәйне.

Эре промышленносте национализациялау тураһында Совнарком декретенең 30 йыллығы

Бөйөк Ленин етәкселек иткән беренсе Совет Хөкүмәте эре промышленносте национализациялау тураһында декрет сығарғанға 28 июнда 30 йыл тулды. Декрет ошо тарихи һүҙҙәр менән башлана ине: «Хужалыҡ емереклегенә һәм аҙыҡ етешмәүгә ҡаршы ҡиҫкен рәүештә көрәшеү маҡсатында һәм эшселәр синыфы менән ауыл ярлылары диктатураһын нығытыу өсөн Халыҡ Комиссарҙары Советы ҡарар итте: Совет республикаһы территорияһына урынлашҡан түбәндә күрһәтелгән промышленность һәм сауҙа-промышленность предприятиеләрен уларҙың бөтә капиталдары һәм мөлкәттәре менән, уларҙың нимәнән ғибәрәт булыуҙарына ҡарамаҫтан, Россия Социалистик Федератив Совет Республикаһының милке итеп иғлан итергә».

Был тарихи документ илебеҙҙә социалистик экономика төҙөү эшендә ҙур роль уйнаны. Уның әһәмиәтен күҙ алдына килтерер өсөн, социалистик революцияның бөтә элекке буржуаз революцияларҙан төп айырмаларын аңларға кәрәк. Иптәш Сталин үҙенең «Ленинизм мәсьәләләренә ҡарата» тигән гениаль хеҙмәтендә был мәсьәләгә классик анализ бирҙе. Иптәш Сталин, буржуаз революция капиталистик экономиканың феодаль общество нигеҙендә үҫеп өлгөрөүе шарттарында башланһа, социалистик революция әҙер социалистик экономика булмаған хәлдә башлана, сөнки ул капитализм нигеҙендә әҙер килеш килеп сыға алмай, тип билдәләне. Бынан инде пролетар революцияның төп бурысы — власте ҡулға алып, яңы социалистик экономика төҙөү бурысы килеп сыға. Әгәр буржуаз революция политик власте буржуазияның баҫып алыуы менән тамамлана, социалистик революция политик власте пролетариаттың ҡулға алыуы менән бары тик башлана ғына әле. Политик власть пролетариатҡа яңы социалистик экономика төҙөү өсөн ҡорал булып хеҙмәт итә.

Бөтә донъяла беренсе совет государствоһы, бөйөк юлбашсылар Ленин менән Сталин етәкселегендә, үҙенең йәшәй башлауының беренсе көндәренән үк социалистик революцияның грандиоз бурыстарын — яңы социалистик экономика төҙөү бурыстарын тормошҡа ашырырға тотондо. Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһы капитализмде емерҙе, етештереү средстволарын буржуазия ҡулынан тартып алды һәм фабрикаларҙы, заводтарҙы, ерҙе, тимер юлдарҙы, банкыларҙы бөтә халыҡ милкенә, общественный милкә әйләндерҙе.

1917 йылдың ноябренән алып 1918 йылдың февраленә тиклем булған осорҙо Ленин «Капиталға ҡыҙыл гвардеецтар атакаһы» осоро тип атаны. 1918 йылдың беренсе яртыһында ул буржуазияның хужалыҡ ҡеүәтен һындыра һәм халыҡ хужалығының команда бейеклектәрен үҙ ҡулына туплай алды.

Советтарҙың икенсе Бөтә Россия съезының мөрәжәғәтендә үк, Совет власе производствоға эшселәр контролен урынлаштыра, тип әйтелгәйне. Ялланған эшселәр көсө булған бөтә промышленность, банк, транспорт һәм башҡа предприятиеләрҙә производствоға, сей материалдарҙы һатып алыуға һәм уларҙы һатыуға эшселәр контроле индерелде. Эшселәр контролен ошо предприятиелә йәки учреждениелә эшләүсе эшселәр башҡарҙылар.

Производствоға эшселәр контроле тарихи яҡтан ҙур роль уйнаны. Уның әһәмиәте шунда булды — ул шунда уҡ капиталистарға производствола саботаж яһау, фабрикаларҙы һәм заводтарҙы совет власенә ҡаршы крепоскә әйләндереү мөмкинлеген бөтөрҙө. Эшселәр контроле совет государствоһына ундарса мең эшселәрҙе производствоға идара итеү менән таныштырырға мөмкинлек бирҙе. Шуның менән промышленносте национализациялауға күсеү эше еңеләйтелде. Эшселәр контроле тураһында 1917 йылдың 27 ноябрендә Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты ултырышында ҡабул ителгән декрет социализмға барыу юлында яһалған тәүге аҙымдарҙың береһе булды — эшселәр контроле аша эшселәр производствоға һәм государствоға идара итеү эшенә өйрәнделәр.

Эшселәр контроленән Халыҡ Хужалығының Юғары Советын (ВСНХ) төҙөүгә күсә башланды. Ленин, банкыларҙы һәм тимер юлдарҙы национализациялау менән бергә бары тик ошо сара ғына яңы социалистик хужалыҡ төҙә башларға мөмкинлек бирәсәк, тип айырыуса күрһәтте. 1917 йылдың 18 декабрендә промышленноскә етәкселек итеү өсөн Халыҡ Хужалығының Юғары Советын төҙөү тураһындағы декрет сығарылды.

Урындарҙа тиҙ арала Халыҡ Хужалығы Юғары Советының органдары төҙөлә башланды. Беренсе булып Петроградта Халыҡ Хужалығы Советы төҙөлдө, уның етәксеһе В. М. Молотов ине.

1917 йылдың 27 декабрендә Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитеты бөтә хосуси банкыларҙы национализациялау тураһында һәм уларҙы государство банкыһына ҡушыу тураһында декрет ҡабул итте.

Банкыларҙы национализациялау буржуазия власен тамырынан уҡ өҙҙө, буржуазияның экономик хакимлек итеүенең иң серьез нигеҙҙәренән береһен юҡ итте һәм социализмдең материаль базаһын нығытты.

Совет власенең беренсе айҙарындағы иң мөһим декреттәр ошондай булды. Улар яңы социалистик ҡоролоштоң башланғысын һалдылар һәм илдең экономикаһын социалистик яҡтан ҡайтанан ҡора башлауҙы аңлаталар ине.

1918 йылдың яҙына халыҡ хужалығының иң мөһим команда юғарылыҡтары: ер, эре фабрикалар, заводтар, тимер юлдар, сауҙа флоты һәм тышҡы сауҙа Совет государствоһы ҡулында ине инде. 1918 йылдың 29 апрелендә Бөтә Россия Үҙәк Башҡарма Комитетының ултырышында Совет власенең нәүбәттәге бурыстары тураһында Ленин докладды буйынса социализм төҙә башлау планы раҫланды. Был план Ленин тарафынан төҙөлгәйне. Ленин былай тип яҙҙы: «Беҙ, большевиктәр партияһы Россияны ышандырҙыҡ. Беҙ Россияны — байҙарҙан ярлылар өсөн, эксплоататорҙарҙан хеҙмәтсәндәр өсөн яулап алдыҡ. Беҙ хәҙер Россияға идара итергә тейешбеҙ». (Ленин, Әҫәрҙәр, 22-се том. 441-се бит).

Иҫкене емереүҙән яңыны төҙөүгә күсергә кәрәк ине.

1918 йылдың апрелендә баҫылып сыҡҡан «Совет власенең нәүбәттәге бурыстары», тигәненең атаҡлы мәҡәләһендә Ленин совет иленең хеҙмәтсәндәрен [illegible] лизм төҙә башлауға, хеҙмәттә [illegible], социалистик дисциплинаһын [illegible] рыу өсөн, хеҙмәт етештереүлеген күтәреү өсөн, эшләп [illegible] өсөн ныҡлы нормалар урын[illegible]рыу өсөн һәм социалистик [illegible] йәйелдереү өсөн [illegible] саҡырҙы. Ленин [illegible] производствоны тарҡатыу[illegible] ҡаршы, прогульщиктарға, [illegible]ҙарға, ҡараҡтарға ҡаршы, [illegible] листик милкте һаҡлау һәм [illegible] тыу өсөн ҡиҫкен көрәшкә [illegible]ҙы. Эшселәр юлбашсыһы [illegible] рыуына эш менән яуап [illegible]. Эшселәр инициативаһы [illegible] таштарсә судтар ойошторолдо, производствола хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн көрә[illegible] йәйелдерелде, хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелде. Илдәге хужалыҡтың социалистик секторы ныҡ[illegible] һәм киңәйҙе.

Совет государствоһы пролетар диктатура дошмандарының ҡаршылығын емереп, социалистик төҙөлөштә көндән-көн киңәйтә барҙы.

Мәскәүҙә 1918 йылдың 26 майынан 4 июненә тиклем бар[illegible] Халыҡ Хужалығы Советтарының беренсе съезы В. И. Ленин докладды буйынса промышленносте [illegible] национализациялауға күсеү [illegible] һында ҡарар ҡабул итте. [illegible] ҡарар Совнаркомдың 1918 й[illegible] 28 июнь декретендә кәүҙәләнде[illegible] декрет илебеҙ хужалығының социалистик секторын киңәйтеү һәм нығытыу буйынса [illegible] булды. Национализациялау[illegible] бөтә промышленносте[illegible] Халыҡ Хужалығының Юғары [illegible]те булды.

СССР бөтә донъяла ин[illegible] дустриаль державаға [illegible]. Промышленность продукцияһының күләме буйынса СССР Бөйөк Ватан һуғышына тиклем үк [illegible] Европала беренсе урынды һәм бөтә донъяла икенсе урынды ала ине.

Илде индустриализациялау [illegible] ҡаһында социалистик революция[illegible] [illegible] бурысы — [illegible] ларса крәҫтиәндәр хужалығын [illegible] коллектив хужалыҡ юлына күсе[illegible] реү бурысы хәл ителде. [illegible] дустриализациялау һәм ауыл хужалығын коллективлаштырыу [illegible] йынса тарих [illegible] ҡыҫҡа [illegible] белеүсе сталинса [illegible] Тыуған ил дошмандары [illegible] беҙҙең тулыһынса [illegible] мин итте.

Хәҙер совет халҡы [illegible] хужалығында алдынғы [illegible] науҫы социалистик промышленносте артабан нығытыу [illegible] кәйтеү өҫтөндә фиҙакәр [illegible] хеҙмәт итә. Хеҙмәтен [illegible] етештереүсәнлеге өсөн, производствола ныҡлы хеҙмәт дисциплинаһы өсөн көрәш, социалистик ярышты йәйелдереү [illegible] Ленинсә күрһәтмәләре [illegible] бынан элекке кеүек, [illegible] бик актуаль булып тора [illegible] һуңғы сталинса биш йыллыҡ 1946—1950 йылдарҙа [illegible] хеҙмәт етештер[illegible] һуғышҡа тиклемге [illegible] ҡарағанда 36 процентҡа [illegible] [illegible]. Сталинса [illegible] дүрт йылда үтәү [illegible] социалистик ярыш [illegible] юғарылыҡҡа [illegible] социалистик ярыштың [illegible] барлыҡҡа кил[illegible].

Биш йыллыҡтың [illegible] йомғаҡтары [illegible] дүрт [illegible] уңышлы рәүештә [illegible] һәм [illegible] үтәлеүен күр[illegible]. Социализм төҙөүҙе тамамла[illegible] социализмдан коммунизм[illegible] күсеү юлында [illegible] бик [illegible] булаҡ.

Б. Шәке[illegible]

СССР һәм Израиль государстволары араһында Посланниктәр алышыу

Израиль государствоһының Сит Ил Эштәре Министре М. Шерток әфәндене, СССР Сит Ил Эштәре Министре В. М. Молотовтың, 1948 йылдың 24-25 майында, Израиль государствоһының, СССР-ҙа миссияһын булдырыу һәм, шулай уҡ, СССР миссияһын Израиль государствоһында булдырыу тағын-дағы алышкан телеграммаларына ярашлы рәүештә, СССР-ҙың Израиль государствоһындағы Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы Посланниге итеп П. И. Ершов һәм СССР-ҙа Израиль государствоһының Ғәҙәттән тыш Посланниге һәм Тулы хоҡуҡлы Министре итеп Голда Мейерсон ханым тәғәйенләнде. (ТАСС).

Политика, фән өлгәшеүҙәре халыкҡа

Беҙҙең илебеҙҙә 30 йыл эсендә фән бик ныҡ үҙгәрҙе. Ул ағымды совет фәненең үҙенсәлек сифатын алды. Иптәш Сталин әйткәнсә, ул: «халыктан бикләнмәй, һәм халыктан үҙен алыҫ тотмай, халыкҡа хеҙмәт итергә әҙер, халыкты мәжбүр итеү буйынса түгел, уның үҙ теләге менән хеҙмәт итергә торған фәндең бөтә өлгәшеүҙәрен халыкҡа еткереүгә әҙер» фән төрөнә инде.

Халык-ара хеҙмәт байрамы көнөндә, 1947 йылдың 1 майында ғалимдәр, общественный-политик эшмәкәрҙәр һәм искусство работниктәре, халыкҡа хеҙмәт итеп, һәм уларға фәндең бөтә өлгәшеүҙәрен еткереү теләктәре менән рухланып, политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһы ойоштороу тураһында беҙҙең интеллигенциябыҙға, ғилми учреждениеларға матбуғат аша мөрәжәғәт иттеләр. Был аңлы башланғыс хөкүмәт һәм совет общественносе тарафынан киң ҡолас ҡаршыланды. СССР Министрҙар Советы ҡарары буйынса был обществоға Мәскәүҙең Политехник музейенең йорто бирелде һәм эш өсөн башҡа шарттар тыуҙырылдылар. Һәм, 1947 йылдың 7—10 июндәрендә, политик һәм фәнни белемдәрҙе таратыуҙың Бөтә Союз обществоһы члендәренең ойоштороу йыйылышы үттө, обществоның правлениеһе һайланды һәм уставы кабул ителде.

Шулай уҡ, 1948 йылдың март айында, Бөтә Союз обществоһының Башкортостан филиалы асыу буйынса Ойоштороу Комитеты төҙөлдө.

Ошо көнгә тиклем бүлектең Ойоштороу Комитеты действительный членлыҡ һәм коллектив членлыҡҡа обществоға алыу буйынса байтаҡ эштәр эшләне. [illegible] 120 кеше алынды, шуларҙан — 59 кеше фәндәр докторлары һәм кандидаттары.

Башкортостан бүлегенең действительный членлары тарафынан [illegible] артығыраҡ тема эшләнде [illegible] инде. Мәҫәлән, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән деятеле доцент иптәш М. Соколов «Ерҙә тормоштоң башланыуы», «Картлыҡ. Үлем һәм оҙон ғүмерлелек» тигән лекцияларҙы әҙерләне. Обществоның действительный члене иптәш Г. Штехер, «Ҡешенең барлыкҡа килеүе», «Оҙон ғүмерлелек өсөн көрәш», «Чарльз Дарвин учениелөре» тигән темаларҙы эшләне. Техника фәндәре кандидаттары И. Емилин, С. Куликов, И. Берсэин иптәштәр фәнни-технологик мәсьәләләр буйынса лекциялар әҙерләнеләр. Ошо көндәрҙә фәндәр кандидаттары Пизов һәм Масленников, БАССР-ҙың атҡаҙанған фән деятеле Чижов иптәштәр В. Г. Белинский тураһында күп кенә урындарҙа лекция уҡынылар.

Халыҡ араһында политик һәм фәнни белемдәр таратыу ҙур әһәмиәткә эйә. Ул хеҙмәтсәндәрҙең культура кимәлен күтәреүҙә, коммунистик тәрбиә биреүҙә күп ярҙам итә.

Партия һәм совет органдары, уҡыу йорттары, техникумдар, культура-ағартыу учреждениеләре, заводтар, клубтар, ҡыҙыл мөйөштәр обществоның эшендә актив ҡатнашырға, уның действительный члендәре булып инергә тейештәр.

Райондарҙағы врачтарҙы, уҡытыусыларҙы, агрономдарҙы лекция пропаганда эшенә тартыу обществоның иң мөһим бурысы булып тора.

Шул маҡсат менән, тиҙ көндәрҙә район интеллигенцияһы йыйылыштарында политик һәм фәнни белемдәр таратыу буйынса Бөтә Союз обществоһының әһәмиәте һәм Башкортостан бүлегенең бурыстары тураһында докладтар [illegible] йыйылыштарҙа Башкортостан бүлегенең Ойоштороу Комитетына ярҙам [illegible] группалары [illegible] район интеллигенцияһының обществоға члендәр [illegible], районда [illegible] эштәре йәйелдерелергә тейеш.

[illegible] ордене Башкортостан халыҡҡа политик һәм фәнни белемдәр таратыу [illegible] — герой, еңеүсе халыҡ коммунистик общество төҙөүсе халыкҡа бирәйек.

З. Изгин,
Обществоның Башкортостан бүлегенең яуаплы секретаре [illegible]ерен башҡарыусы.

Ауыл Советтәренең ярышына етәкселек итгә

Борай районы ауыл Советтәре, [illegible] менән республика[illegible] араһындағы социалистик ярышҡа ҡушылып, районлың колхозларында быйыл, үткән йылға сағыштырғанда, сәсеү майҙанын 9700 гектарға, шул иҫәптән бойҙай ҡултураһын 6200 гектарға арттырырға йөкләмә алғайнылар. Шулай уҡ социалистик ярыш йөкләмәһендә халыҡтың көн-күреш шарттарын яҡшыртыуға ҙур иғтибар бирелә.

Күпселек ауыл Советтәре ойоштороу-массовый эштәрҙе яҡшы итеп ҡороуҙары, депутаттарға һәм ауыл активына таянып колхозсыларҙы улар эшкә дәртләндереүҙәре арҡаһында сәсеү майҙанын киңәйтеү тураһында алған йөкләмә тулыһынса үтәлде.

Ярыпта Киҙгәл ауыл Советы (председателе иптәш Х. Садрисламов) айырыуса ҙур уңыштарға өлгәшеп килә. Был ауыл Советына ҡараған колхоздар сәсеү майҙанын, үткән йылдыҡы сағыштырғанда, 530 гектарға, шул иҫәптән бойҙай ҡултураһын 426 гектарға арттырҙы. Шул уҡ ваҡытта сәсеү, үткән йылға ҡарағанда, юғары агротехник кимәлдә 20-25 көнгә иртә тамамланды. Хәҙер колхоздар сәсеүлектәрҙе тәрбиәләү эштәрен ойошҡан рәүештә алып баралар һәм урожай йыйнауға өлгө[illegible] әҙерләнәләр.

Өлгәшелгән уңыштарҙың төпкө шунда, ауыл Советы эргәһендәге ауыл хужалығы даими комиссияһы сәсеүгә әҙерлектә үҙенең көндәлек контроленә алды һәм был етешһеҙлектәрҙе үҙ ваҡытында бөтөрөүгә практик ярҙам итте. Сәсеүгә төшөр алдынан яҙғы эште уңышлы үткәреү сараларын билдәләне һәм уны сессияға ҡуйып наказлаштырҙы. Сәсеү барған осорҙа депутаттарҙы, шулай уҡ ауыл активын иң яуаплы участокларға ҡуйҙы.

Депутаттар ауыл хужалығы эштәрен уңышлы үткәреү менән бергә, башҡа эш тармаҡтарын да тешле тәрәнкелеккә ҡуйыу өсөн көрәшә. Бында аҡса туплау планы кварталдан-кварталға арттырылып үтәлә. Государствоға ауыл хужалығы продукцияларын тапшырыу заданиеләре лә ваҡытында үтеп килә.

Депутатар һайлаусылар менән тығыҙ бәйләнеш тоталар. Мәҫәлән, депутаттар Г. Ғөбәев, Т. Бикташева иптәштәр ошо көндәрҙә генә үҙ һайлаусыларына үҙҙәренең эштәре тураһында отчет доклад яһанылар. Һайлаусылар депутаттарға өҫтә наказлар биреү менән бергә киләсәктә тағы ла ойошҡанлыҡ эшләү өсөн яңы йөкләмәләр алдылар.

Йомаҡа (председателе иптәш Хәйруллин), Ҡараерек (председателе иптәш Муратов) һәм Әжәк (председателе иптәш Хужин) ауыл Советтәре ауыл хужалығын күтәреү һәм хеҙмәтсәндәрҙең культура торошон артабан яҡшыртыу өлкәһендә ҙур ғына уңыштарға өлгәшеп килаләр.

Ләкин районлың ҡайһы бер ауыл Советтәре үҙҙәренең эштәрен көнлөң бөгөнгө көн талаптарына яуап бирерлек итеп ойоштормағандар. Мәҫәлән, Кәшкәләү, Мамалы ауыл Советтәре эргәһендәге даими комиссиялар хеҙмәтсәндәрҙең наказдарын үтәү буйынса бер төрлө эш алып бармайҙар. Комиссияларҙың эш планы юҡ, ултырыштар үткәрелмәй.

Урындағы Советтәргә һайлауҙарҙа һайлаусыларҙың һыу ала торған урындарҙы тәртипкә килтереү һәм яңы өйө ҡаҙыу, уҡыу культура ағартыу эштәрен яҡшыртыу сараларын күреү тураһындағы наказдары үтәлмәйенсә баҫылып киләләр.

Был хәл, район Советы исполкомының ауыл Советтәренең социалистик ярыштары менән етәкселек итеүен, алдынғыларҙың өлгәшелгән гүзәл эш тәжрибәләрен артҡа ҡалыусыларға ҡылыу рәүештә күсереүен һәм депутаттарҙы эшкә өйрәтеүен талап итә. **Г. Ишмитов.**

Яңы урожайҙың игенен кабул итеүгә бөтә элеваторҙарҙы, складтарҙы өлгөлө әҙерләргә!

Мөһим эшкә яуапһыҙ караш

ДЫУАН. (Телеграф аша, үҙ хәбәрсебеҙҙән). Заготзерноның Мәсәгут пунктына автомашиналар әленән-әле килеп торалар. Бына бер нисә машина берҙәм килеп туҡтаны. Алғы машинаның кабинаһы тәҙрәһенән шофер Посжаевтың башы күренде. Ул грузчиктарға ҡараны һәм пункт мөдире Федоровҡа:

— Тиҙерәк тейәтеү хәстәрлеген күрегеҙ, иптәш директор, — тине.

Ләкин бында ашыҡмайылар, өс машинаға тейәү өсөн бер сәғәт урынына, 10 сәғәт ваҡыт үтеп китте. Был осраҡлы хәл түгел. Күп ваҡыттарҙа тейәүҙе көтөп, машиналар 6—8 сәғәт тик ултыралар. Пунктта иген тейәүҙә 25 кеше урынына, тик 8 грузчик эшләй. Мәсәгут ауыл Советы председателе Скрипов пунктты грузчиктәр менән тәьмин итмәне.

Мәсәгут пунктындағы иген 15 көн эсендә ташылып бөтөргә тейеш ине. Инде бер ай тулып килә, ә игенде ташыу һаман тамамланмай. Бынан башҡа, Дыуан районында әле 8 эске пункттағы иген ташылырға ла башланылмаған.

Автомашиналарҙың тулы нагрузкалы эшләмәүҙәре һөҙөмтәһендә май айы графигы ни бары 40 процентҡа үтәлде, шулай уҡ июнь айы графигы лә өҙөлә. Союзтранстың 5-се номерле Мәсәгут автобазаһы директоры Самарин шоферҙар араһында хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу, машиналарҙың тулы нагрузкала эшләүен тәьмин итеү урынына, юлдарҙың насар булыуына, шулай уҡ башҡа сәбәптәргә һылтана. Шул арҡала шоферҙар иген ташыу заданиеһен үтәү өсөн яуапһыҙлыҡ күрһәтәләр. Шофер Водолеев, Москутов, Хужин, Андреев июнь айының 15 көнө эсендә 92-шәр тонна урынына, ни бары 8—20-шәр тонна ғына иген ташынылар.

Районда иген ташыуға колхоздарҙың тик ике автомашинаһы ғына эшләй. Ә башкалары май айынан бирле был эштә ҡатнашмайҙар. Район Советы башҡарма комитеты етәкселәре Заготзерно пункттары эшенә ҡыҫылмай ғына ятып торалар.

Н. Ғалимов.

Ғәлиуллин бригадаһы яҡшы эшләй

Шишмә районының «Тыңсары» колхозына хеҙмәт күрһәткән Дурасов МТС-ының иптәш Ғиниулла Ғәлиуллин етәкселек иткән бригадаһы быйыл айырыуса яҡшы эшләй. Ул тракторҙарҙың яҙғы бәсеү эштәре планын 163 процентҡа үтәгәйне. Бригада ҡараған колхоза 155 гектар пар һөрөү. Социалистик ярышта тракторист Риис Садретдинов алда бара. **В. Халиков.**

Иген кабул итеү өсөн әҙерлекте тиҙерәк тамамларға

Иген әҙерләү кампанияһын уңышлы үткәреүҙә иген кабул итеү пункттарында техник базаны ваҡытында әҙерләү ҙур роль уйнай. Һәр бер элеватор, склад яҡшы итеп ремонтланған булырға һәм игенде тәүлек әйләнәһенә кабул итерлек хәлгә килтерелергә тейеш.

Был эштәр күпселек урындарҙа бик аҡрын алып барылалар. Мәҫәлән, 10 склад ремонтларға тейешле булған Заготзерноның Табын пунктында бер генә склад та әҙер түгел. Шулай уҡ Приют, Груздев пункттарында ла (директорҙары Хафизов һәм Мельников иптәштәр) ремонт эштәре башланып башланмаҫ хәлдә генә тора.

Иген кабул итеү пункттары техник базаһын ремонтлауҙың былай насар барышын аҡларлыҡ бер төрлө лә сәбәп юҡ. Бөтә пункттар ҙа төҙөү материалдары менән үткән йылда уҡ [illegible] тәьмин ителгәндәр. Бәлә шунда: пункттарҙың етәкселәре ошондай ҙур, государство әһәмиәтендәге эшкә серьез ҡарамайҙар һәм элеваторҙарҙы, эске пункттарҙы әҙерләү эшенә саралар күрмәйҙәр.

Техник базаларҙы ремонтлау эшен һис кисекмәҫтән көсәйтеү талап ителә. Был эштәр 15 июлгә тулыһынса тамамланған булырға тейеш. Быны өсөн һәр бер әҙерләү пунктында булған көстәрҙе һәм мөмкинлектәрҙе файҙаланырға кәрәк.

Үткән йыл ҡайһы бер пункттарҙа яғыулыҡ булмағанлыҡтан, сушилкалар нормаль эшләмәнеләр. Күп кенә урындарҙа был хәлдәр быйыл да ҡабатланырға юл ҡуйылар. Заготзерноның Бөрө пунктында (директоры иптәш Просудин) 2370 кубометр утын ҡуйылырға ҡарамаҫтан, ни бары 13 кубометр утын ташылып ҡуйылған. Ә Ҡарламан пунктында ошо көнгә тиклем бер генә кубометр яғыулыҡ та әҙерләнмәгән. Бындай һүлпәнлеккә һис кисекмәҫтән бөтөрергә, 1 августҡа тиклем һәр бер пунктта 3 айға етерлек утын запасы булдырырға кәрәк.

Иген кабул итеү пункттарында эшләүсе работниктарҙың штатын комплектовать итеү өсөн бөтә саралар күрелергә тейеш. Һәр бер работниктың үҙ вазифаһын яҡшы белеүенә һәм теүәл үтәүенә өйрәнергә кәрәк. Үткән йыл Шишмә пунктында лабораторияла түбән квалификациялы кешеләр эшләнеләр. Шуның арҡаһында игендең сифатын билдәләүҙә хаталар ебәрелде. Башҡа етешһеҙлектәр ҙә күп кенә булды. Быйыл уларға юл ҡуйырға ярамай. Яҡын көндәрҙә бөтә штатты маҫсалы кешеләр менән комплектовать итеп, уларҙы үҙ бурыстарын үтәүгә ныҡлы әҙерләргә кәрәк.

А. Лукинин,
ВКП(б) Өлкә Комитеты инструкторы.

Дәүләкән районының «Коммунар» колхозында иптәш М. Я. Шишак етәкселегендәге звено үҙ участкаһындағы сәсеүлектәрҙе яҡшы тәрбиәләй.

Һүрәттә: Звено тары ашлығын утауҙа. Алғы планда звено етәксеһе М. Я. Шишак. В. Жданов фотоһы.

Республика колхозларында пар һөрөүҙең барышы

(План үтәлеше 1948 йылдың 2[illegible] июненә, проценттарҙа)

1.	Туймазы	116,7
2.	Дәүләкән	103,6
3.	Өфө	96,7
4.	Яңауыл	96,3
5.	Мишкә	83,4
6.	Асҡын	82,7
7.	Благовещен	80,3
8.	Тәтешле	80,1
9.	Әлшәй	79,4
10.	Покровка	79,1
11.	Бөрө	78,6
12.	Оло-Тиләк	76,3
13.	Балтач	76,0
14.	Баҡалы	75,0
15.	Ҡалтасы	74,9
16.	Иглин	73,7
17.	Дыуан	72,5
18.	Байҡыбаш	72,1
19.	Бүздәк	71,3
20.	Благовар	70,0
21.	Салауат	67,5
22.	Стәрлетамаҡ	67,1
23.	Белорет	63,8
24.	Бозаяз	63,6
25.	Иәрмәкәй	63,3
26.	Шишмә	63,3
27.	Белокатай	63,0
28.	Краснокам	62,7
29.	Борай	61,9
30.	Архангель	61,5
31.	Шаран	61,5
32.	Дүртөйлө	60,5
33.	Маҡар	59,5
34.	Илеш	58,5
35.	Ҡариҙел	58,4
36.	Саҡмағош	56,3
37.	Мәсетле	56,1
38.	Учалы	56,0
39.	Нуриман	55,6
40.	Ҡандра	53,9
41.	Бәләбәй	53,8
42.	Кушнаренко	53,4
43.	Мәнәү	53,2
44.	Ҡырмыҫҡалы	52,9
45.	Ҡыйғы	52,5
46.	Бишбүләк	51,3
47.	Стәрлебаш	45,3
48.	Әбйәлил	44,0
49.	Йомағуҙа	43,5
50.	Ауырғазы	42,9
51.	Кейәргәзе	42,6
52.	Ғафури	42,5
53.	Баймаҡ	40,1
54.	Абзан	39,8
55.	Күгәрсен	35,3
56.	Мәләүез	34,6
57.	Федоровка	33,5
58.	Хәйбулла	30,6
59.	Матрай	30,0
60.	Воскресен	26,0
61.	Зиянчура	18,1
62.	Йылайыр	15,8
63.	Бөрйән	14,0

АУЫЛ ХУЖАЛЫҒЫН ЭЛЕКТРЛӘШТЕРЕҮ ЭШЕН КӨСӘЙТЕРГӘ

Башкортостандың экономик һәм тәбиғи шарттары ауыл хужалығын электрләштереү өсөн бик уңайлы. Беҙҙә шаулап аҡҡан көслө йылғалар тиһеңме, торф, ағас, таш, эзбиз тиһеңме — бөтәһе лә етерлек. Шуның өҫтәүенә колхоздар һәм ауыл хужалығы предприятиеләре государствонан йыл һайын бик күп күләмдә беренсе класс электр оборудованиеһе, финанс ярҙамы алалар. Республикала ауыл хужалығына теләһә ниндәй минутта ярҙамға килә ала торған бик ҡеүәтле промышленность бар.

Ләкин беҙҙең республикабыҙҙа ауыл хужалығын электрләштереүҙең кимәле күршеләге Челябе, Свердловск, Молотов өлкәләренән байтаҡ түбән. Быға тиклем эшләп килгән электр станцияларының селтәре колхоздарҙың егерменән бер өлөшөн генә хеҙмәтләндерә.

Башкортостан халыҡ хужалығындағы был серьез кәмселекте бөтөрөү буйынса быйыл колхоздарҙа күп кенә эштәр башҡарылырға тейеш ине. БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитеты 1948 йылда ауыл ерҙәрендә бөтәһе 4695 киловатт ҡеүәтендә 117 электр станцияһы төҙөү планын кабул иттеләр. Был үткән йылғы планға ҡарағанда бермә-бер тип әйтерлек артыҡ. Ауыл өсөн 117 станцияның һ-е шефлыҡ ярҙамы тәртибендә промышленность предприятиеләре төҙөп бирергә тейештәр.

Башкортостан хөкүмәтенең һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының ҡарарында шулай уҡ 1949 һәм 1950 йылдарҙа электр станцияларын төҙөүгә әҙерлек тураһында, айырым алғанда гидростанциялар төҙөү өсөн урын һайлау, материалдар әҙерләү һәм проект документацияларын булдырыу тураһында бик асыҡ әйтелгәйне.

Ошо ҡарарҙы үтәү өсөн көрәшеп, ҡайһы бер райондарҙа алдынғы колхоздар станцияларҙы төҙөү йәки киләһе йылғы төҙөү эштәренә әҙерлек буйынса күп кенә эш алып баралар. Был йәһәттән Маҡар, Балтач райондарының ҡайһы бер колхозларын күрһәтергә мөмкин. Маҡар районында Хажи гидростанцияһын төҙөүҙә «Марс», «Аҙнай» ауыл хужалығы артелдәре һәм «Алға», «Сайран» промартелдәре ойошҡан рәүештә эшләйҙәр. Төҙөлөш өсөн кәрәкле материалдар, эшсе көсө етерлек бирелгән. Төҙөлөштә ҡатнашыусылар өсөн дөйөм туҡланыу ойоштолған. Эштәрҙең барышына колхоз етәкселәре ныҡлы контроль ҡуйғандар. Станцияны төҙөү көндән-көн алға бара. Артелдәр көҙгә станцияның энергияһынан файҙалана башлаясаҡтар.

Үкенескә ҡаршы, күпселек райондарҙа БАССР Министрҙар Советының һәм ВКП(б) Өлкә Комитетының ҡарары бик һүлпән үтәлә. Быны шундай фактылар менән генә лә күрһәтеп була. Электр станцияларын төҙөүгә ҡатнашырға тейеш булған 172 колхоз һәм күп кенә ауыл хужалығы предприятиеләре бөтә ҡыш буйына төҙөлештәр өсөн бары 10 мең кубометр самаһы ғына ағас ташығандар. Ә төҙөлөштәргә кәмендә 58 мең кубометр ағас кәрәк. Таш, кирбес, эзбиз кеүек материалдарҙың сирегә лә әҙерләнмәгән.

Башкортостан «Сельэлектро» тресы үткән 5 ай буйына төҙөлөштәрҙең проект документацияһын эшләп бөтөрөргә һәм заказчиктар менән договор төҙөшергә «өлгөрмәне». Күп кенә предприятиеләр ауылға ярҙам күрһәтеү буйынса үҙ өҫтөрөнә алған йөкләмәләрен шулай уҡ онотҡолар.

Бына хәҙер бик ҡыҙыу рәүештә төҙөлөш эштәрен башҡарыу ваҡыты килеп етте. Ләкин күп кенә колхоздарҙа электр станцияларын төҙөү майҙандарында материалдар ҙа, төҙөүселәр ҙә бик аҙ. Миҫал өсөн колхоздарҙағы төҙөлөштәрҙең иң ҙурҙарының береһен — Яңауыл ГЭС-ын алып ҡарайыҡ. 16 колхоз был ГЭС-ты 3 йыл буйы «төҙөйҙәр». Өс йыл эсендә унда бығанһың бер аҙ өлөшө эшләнгән, бер нисә тиҫтә бағана ултыртылған. Колхоздарҙа яҙғы баҫыу эштәре тамамланған һәм эшсе көстәр байтаҡ бушаған булыуға ҡарамаҫтан, төҙөлөштә 120 кеше урынына, бары 30—40 кеше эшләй. Уларҙың да күбеһе үҫмерҙәр. Бында хеҙмәт дисциплинаһы тураһында һөйләп тораһы ла юҡ — колхозсылар эшкә ҡасан теләйҙәр шунда башлайҙар, ҡасан теләйҙәр — шунда туҡтайҙар. Райондың һәм артелдәрҙең етәкселәре улар янында бик һирәк булалар.

Төҙөлөш майҙанында булған материалдар күп тигәндә бер айға етерлек. 650 кубометр таш әҙерләргә һәм килтерергә кәрәк. Был эш әле башланып та ҡаралмаған. Бөтә төҙөлөштә 2 аттан ғына торған транспорт бар.

ГЭС-ты төҙөү мәсьәләһе ВКП(б)-ның Яңауыл райкомы бюроһында бер нисә тапҡыр тикшерелгән һәм был турала яҡшы ҡарарҙар кабул ителгән. Ләкин конкрет эш менән нығытылмаған был ҡарарҙар төҙөлөштә урынлы ҡуҙғатыуға бик аҙ ярҙам итәләр. Тәүге партия ойошмалары төҙөлөш эштәренең ситтә торалар.

Төҙөлөш материалдарының бик аҙ әҙерләнеүе һәм эшсе көстәренең етерлек булмауы Яңауылда ғына түгел, бәлки күп станцияларҙы төҙөүгә төп тотҡарлыҡ булып тора. Быны раҫлау өсөн тағы бер миҫал килтерәйек. Мәсетле районы быйыл тотош электрләштерелгән район булырға тейеш. 5 ҙур станцияны төҙөү өсөн унда бөтә кәрәкле материалдар ҙа ебәрелгән. Ләкин колхоз етәкселәре төҙөлөш объекттарын материал һәм эшсе көстәре менән тәьмин итмәү арҡаһында ғына станцияларҙы быйыл ходҡа ебәрә алмау ҡурҡынысы килеп тыуған. Баҡалы, Ғафури райондарында ла шундай уҡ хәл.

Промышленность предприятиеләре лә үҙ йөкләмәләрен бик насар үтәгәндәр. Был бигерәк тә Өфөләге, Черниковскиҙағы һәм Стәрлетамаҡтағы эре төҙөлөш ойошмаларына ҡағыла.

Билдәле булғанынса, Ленин орденле Өфө нефть эшкәртеү заводы коллективы май аҙағында уҡ Башкортостандың бөтә предприятиеләренә мөрәжәғәт итеп, колхоздарҙы электрләштереү эшенә ярҙам итергә саҡырғайны. ВКП(б) Өлкә Комитеты был завод коллективының саҡырыуын хуплау һәм уның буйынса тейешле саралар күреү тураһындағы ҡарары күп кенә предприятиеләрҙә үтәлә башланған.

Башкортостанда ауыл хужалығын электрләштереүҙең хужалыҡ әһәмиәте лә һәм культура-тәрбиә әһәмиәте лә бик ҙур. Колхоздарҙы электрләштереү эшенә улар ҙур үҙҙәренең көстәре һәм мөмкинлектәре, бер үк ваҡытта промышленность предприятиеләренең дә көстәре йәлеп ителергә тейеш.

Урожай йыйыу эштәре башланғанға тиклем төҙөлөштәрҙә эшләүҙе киң рәүештә ойоштороп ебәрергә, колхоздарҙы электрләштереү планын тулы үтәргә кәрәк.

Х. Рафиков

БЕҘҘЕҢ РЕСПУБЛИКАЛА



Благовар районы «Һабансы» колхозы клубы яңынан төҙәкләндереп һәм ҙурайтып эшләнде.

Һүрәттә: Клубтың башын тимер менән ябыу вакыты.

Г. Буравин фотоһы.

Стәрлетамак командаһының еңеүе

27 июнда «Динамо» стадионында футбол буйынса Башкортостан беренселегенә осрашыу булды. Бында Стәрлетамак калаһының «Родина» командаһы менән Өфө калаһының «Динамо» командаһы осраштылар. Матчтың беренсе таймы 2:1 иҫәбе менән «Родина» (Стәрлетамак) командаһы файҙаһына тамамланды. Икенсе таймда «Динамосылар», ни тиклем генә еңергә тырышып уйнаһалар ҙа, уңышка өлгәшә алманылар.

Уйын тамамланыуға ике минут калғанда Стәрлетамак футболистәре «Динамо» капкаһына өсөнсө тупты индерҙеләр һәм матч 3:2 иҫәбе менән Стәрлетамактың «Родина» командаһы файҙаһына тамамланды.

Яңы төҙөлөштәр

ШАРАН. «Беренсе Май» колхозы һуғыштан һуңғы биш йыллыкта колхозда байтак яңы төҙөлештәр булдырыуҙы планлаштырғайны. Колхоз был планды уңышлы тормошка ашыра. Һуңғы йылда ғына ике автомашиналык гараж, тимерлек, таш келәт, правление канцелярияһы, ике стандарт конюшня, быҙауҙар аҙбары, пожар депоһы һәм 300 кеше һыйырлык колхоз клубы һалынды.

Общественный төҙөлөштәрҙән башка, колхозсылар үҙҙәренә лә яңы йорттар һалалар. Элекке бәләкәй генә өйҙәр урынына икешәр бүлмәле, кухнялы, бейек, якты йорттар калкып сыға. Йорт тирәһенә декоратив һәм емеш-еләк ағастары ултыртыла. Тик ағымдағы йылда ғына ете колхозсы яңы йорт һалып инде.

Баксалар, парктар рәшәткәләнә

Быйыл Өфө калаһының архитектура мастерскойы баксаларҙы, парктарҙы һәм бульварҙарҙы суйын рәшәткәләр менән әйләндереүҙе планлаштырғайны. Май башынан ук был эш үтәлә башланы.

Ауыл хужалығы институты һәм авиация техникумы эргәһендәге 230 метр оҙонлоғондағы бульварҙы рәшәткәләү тамамланды ла. Башстройтрест стахановсылары, институт һәм техникум студенттәре бульварҙы матурлау һәм ҙурайтыу эшендә ихлас катнашалар.

Быйыл тағы Маяковский исемендәге баксаны рәшәткәләү эше башкарыласак.

Укытыусылар семинары

Хәйбулла районы укытыусылары укыу йылы тамамланыу менән үҙ белемдәрен күтәреү эшенә керештеләр.

Ошо көндәрҙә генә район мәғариф бүлеге ситтән торол укыусы 76 укытыусыны Темәс һәм Ылайыр педучилищеләренә йәйге экзаменацион сессияға оҙатты.

Бынан тыш, 15 укытыусы Өфөгә укытыусыларҙың белемдәрен камиллаштереү институтына бер айлык курска китте.

Укыу йылы аҙағында мәғариф бүлеге башланғыс мәктәп укытыусыларының өс көнлөк семинарын уҙғарҙы. Семинарҙа укытыусылар укыу йылына йомғак, коммунистик тәрбиә, укытыусыларҙа фекерләү тәрбиәләү тураһында докладтар тыңланылар. Докладтар буйынса 13 укытыусы сығыш яһаны. Семинарҙа 134 кеше катнашты.

Хәҙер мәғариф бүлеге 5—10-сы клас укытыусыларын семинарға саҡырыуға әҙерләнә.

Балалар йәслөләре

Республиканың колхоздарында бесән һәм урожай йыйнау осоронда 1.665 балалар йәслеһе асыласак. Был йәслөләрҙә 45 мең бала тәрбиәләнәсәк. Хәҙер райондарҙа балалар йәслеһендә эшләү өсөн 2 мең тәрбиәсе кыҫка сроклы курстарҙа әҙерләнде.

Күпселек колхоздарҙа балалар йәслеһе өсөн биналар һәм кәрәкле булған продуктылар бүленде. Хәҙерге көндә балалар йәслеһе өсөн билдәләнгән биналарҙы оборудовать итеү эштәре алып барыла.

Стәрлетамак районы колхоздарында 35 йәслелә 1.100 бала, Бөрө районы колхоздарында 35 йәслелә 800 бала, Туймазы районы колхоздарында 40 йәслелә 730 бала тәрбиәләнәсәк.

Башкорт операһы Чкалов калаһында

Башкорт опера һәм балет театры июнь айында Чкалов калаһында үҙенең йәйге гастролен башланы.

Чкаловсылар беренсе көн композитор Бизеның «Кармен» операһын тыңланылар. Опера ҙур уңыш менән үтте. Икенсе көндә «Акбуҙат» операһы күрһәтелде.

Зал тамашасылар менән тулы булды. Опера бөткәндән һуң тамашасылар опера театры артистарын оҙак һәм көслө алкыштар менән котланылар.

Башкорт опера һәм балет театры Чкалов калаһында 1 сентябргә тиклем булып, 90 спектакль бирәсәк.

Удар айлыкта республикалағы юлдарҙы, күперҙәрҙе тулы тәртипкә килтерергә!

Юл төҙәкләндереү энтузиастары

Сакмагошлылар юл төҙәкләндереү энтузиастары, тип атайҙар. Был данды улар үткән йыл һулап алдылар — юл төҙәкләндереү эшендә өлгәшкән уңыштары өсөн уларға БАССР Министрҙар Советы һәм ВКП(б) Өлкә Комитетенең күсмә Кызыл Байрағы һәм өс мең һум аҡсалата бүләк бирелгәйне.

Сакмагош районы хеҙмәтсәндәре быйыл да районның юлдарын ремонтлауҙа тырышып эшләйҙәр. Быйыл өсендә улар күперҙәрҙе капиталь ремонт уҙғарыу йыллык планын 87 процентка, юлдарҙы ремонтлау планын 90 процентка үтәнеләр.

Хәҙер сакмагошлылар юлдарҙы [illegible] республика удар айлығына ҡушылдылар. [illegible] Юл төҙәкләндереү эшендә районда [illegible] хеҙмәтсәндәре эшләй. Улар менән ауыл Советы башкалары, районы Советы активистары етәкселек итәләр. [illegible]

А. Сухов.

Мөһим эшкә баһа бирел еткермәйҙәр

БОРАЙ. (Телефон аша). Райондың күпселек колхоздары юл төҙәү айлығын үткәреүҙә үҙ ойошканлыҡ күрһәтәләр. «Искра» колхозы юл төҙәүҙә һәр көндә 8 ат, 32 кеше катнаша. Улар беренсе биш көнлек заданиелән 200 процентка еткереп үтәнеләр. Колхоз бынып 19 пагон мәтр күләмендә юл һалды.

«Огонек» колхозы ла, үҙенә бирелгән 5 көнлөк заданиены тулыһынса үтәне. Был бер генә бригаланың торған балысай колхозы буйынса карамастан, юл төҙәү эшенә 4 ат, 8 кеше беркетте. Каганович исемендәге колхоздан да айлыкты үткәреүҙә 40 кеше, 20—30 ат катнашлык итә.

Ләкин алдынғылар менән бер рәттән, юл төҙәү эшенә баһа бирел еткермәүсе ауыл Советтаре һәм колхоздар юк түгел. Мәсәлән, Чалкак ауыл Советындағы 7 колхозда юл төҙәүгә бары 60 ат, 200 кеше катнашырға тейеш булһа ла, уларҙың береһе лә эшкә башламаған әле. «Кызыл таң» колхозы (председателе иптәш Даулетов) члендәре — беҙ үҙ территориябыҙҙағы юлдарҙы төҙәтәбеҙ — тигән һылтау табып, Борай—Казанцево араһындағы юл төҙәүгә ҡатнашмай килә.

Юл төҙәү эштәре Берлаш, Казанцево, Теплек ауыл Советтарында ла насар бара. Ошо аркала Борай—Казанцево юл өсөн бирелгән биш көнлек заданиены тыуҙырылып бирмәне. Бында 460 кеше, 232 ат урынына 203 кеше һәм 71 ат кына катнашты.

Г. Ишмитов.

Ойошҡан рәүештә эшләйҙәр

Туймазы районының юлдар төҙәкләндереү эше киң йәйелдерелде. Бынып Туймазы—Бакалы юлына яңынан 2 километр ташлы йүлә, ике юлларҙа юл һибелә, күперҙәр ремонтлана.

Районның хеҙмәтсәндәре юлдарҙы төҙәкләндереү буйынса удар айлыкка ҡушылып, юл һәм күперҙәрҙе ремонтлау планын 15 июлгә тамамлау өсөн, үҙ-ара социалистик ярышты киң йәйелдереп ебәрҙеләр. Ремонт үҙәренә урындарҙа һәр ағас, таш һәм ком тәшелән һәйелды. Был ярышта юлдарҙы төҙәкләндереүҙә «Уңышка», «Сулпан», «Смена», Нуриманов һәм М. Гафури исемендәге ауыл хужалык артелдәренең колхозсылары айырыуса ойошкан рәүештә эшләйҙәр.

И. Маев.

СИТ ИЛДӘРҘӘН ТЕЛЕГРАММАЛАР

Чехословакияның коммунистәр һәм социал-демократтар партияларының берләшеүе

ПРАГА, 27 июнь. (ТАСС). Бөгөн Прагала коммунистәр һәм социал-демократтар партиялары вәкилдәренең ике партияны Чехословакияның берҙәм коммунистәр партияһына берләштереүгә арналған тантаналы йыйылышы булды.

Йыйылышта 2.361 делегат, социал-демократтар һәм коммунистәр партияһының 84 иң күптәнге члендәре, милли фронтка инеүсе бөтә политик партияларҙан һәм общественный ойошмаларҙан, 500 кунак һәм вәкилдәр катнашты.

Йыйылышты социал-демократтар һәм коммунистәр партияһын берләштереү буйынса үҙәк комитет председателе премьер-министр Антонин Запотоцкий асты. Социал-демократик партия вәкиле милли собраниенең председателе доктор Йон Чехословакия коммунистәр партия председателе, республика президенте Клемент Готвальдтең котлау хатын иғлан итте. Йыйылыш Готвальдтең котлауын көслө овация аҫтында каршыланы һәм уға яуап хаты ебәрергә карар итте. Йыйылыш адресенә илдең төрлө ойошмаларынан фабрика һәм заводтарҙың эшселәр һәм хеҙмәткәрҙәр коллективенән 500 самаһы телеграмма килде. Улар коммунистәр һәм социал-демократтар партияларын берләштереүҙе һәм Чехословакияның берҙәм коммунистәр партияһын төҙеүҙе котлайҙар.

Словакия коммунистәр партияһы исеменән йыйылышты был партияның генеральный секретаре Баштованский котланы. «Эшселәрҙең ике партияһын берләштереү, — тине Баштованский,—берҙәм етәкселектә дейөм Чехословакия коммунистәр партияһын төҙәү өсөн нигеҙ һәм төп әҙерлек булып тора. Бындай партияны беҙ тиҙ арала төҙербеҙ», Баштованский тарафынан Советтәр Союзы халыктарының бөйөк юлбашсыһы, Генералиссимус И. В. Сталиндең исеме әйтелеүе йыйылыш тарафынан көслө, тантаналы овация һәм «Йәшәһен бөйөк Сталин» тигән һүҙҙәр менән каршыланы.

Йыйылышта шулай ук Чехословакияның социал-демократик партияһы председателе Шлехта, халык партияһы председателе министр Петр, үҙәк профсоюз Советы председателе Кольский, Чехословакия эшселәр хәрәкәтенең иң карт деятельницаһы Коушова һәм хеҙмәтсәндәрҙен, Чехословакия армияһының һәм общественный ойошмаларҙың күп һандағы делегаттары котланылар.

Унан һуң делегаттар тарафынан кайнар рәүештә каршыланған Чехословакия социал-демократик партияның председателе, премьер-министрҙең урынбаҫары Зденек Фирлингер доклад менән сығып яһаны. Ул Чехословакияның социал-демократик партияһының 70 йыл йәшәү осоронда үткән юлына анализ яһаны. Фирлингер көнбайыштағы ук социал-демократтарҙың һәм уларҙың Чехословакия социал-демократияһындағы ялсыларының хыянатсыл эшмәкәрлектәрен тәнкитләне. Улар үҙҙәренең хужаларына ярарға тырышып Чехословакия халкын яңы һәләкәткә алып барырға һәм уға яңы Мюнхенде тағырға тырыштылар. Беҙ, тине Фирлингер, бойороклан буйынса түгел, ә үҙ иркебеҙ буйынса, үҙ халкыбыҙҙың һәм социализмдең юғары интерестәре менән етәкселек ителеп берләшәбеҙ. Беҙ компартияға саф йөрәктән, ныклы ышаныс менән инәбеҙ һәм шулай итеп беҙ үҙебеҙҙең социалистик идеалларыбыҙҙы иң яҡшы ысул менән үтәйбеҙ. Беҙ ошондай партияға инәбеҙ, ул йәш һәм ижади марксизмде кауҙәлдерә. Был партияның башында беҙ бөтәбеҙҙә ышанған кеше беҙҙең президентебеҙ Клемент Готвальд тора. Беҙҙең көүсә союзнигебеҙ Советтәр Союзы менән һәм башка демократик, тыныслык һөйөүсе государстволар менән кулға кул тотошоп беҙ хетле киләсәккә, социализмга барабыҙ.

Йыйылышта ҙур доклад менән премьер-министр Антонин Запотоцкий сығыш яһаны. Йыйылышта катнашыусылар уны көслө алкыштар менән каршыланылар.

Эшселәр синыфы, тине Запотоцкий, үҙ азатлығына ирешеү өсөн көрәшен һәм һынауҙарҙың ауыр мәктәбен үтте. Был көрәштә һәм еңеү иң эшсе синыфка хас тарһына әрәк булмаһы, балки был идеяларҙың һәләтлегән һәм көслө кауҙәндереүсе етәкселәр ҙә карак алды. Маркс, Энгельс, Ленин һәм Сталин ошондай юлбашсылар булып торалар. Бөйөк юлбашсылары — Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин ученияһенә һәм васыяттары беҙҙең партиябыҙ һәр вакыт тоҙ булып калыр. Ленин һәм Сталин партия авангард һәм эшсе синыфы ойошмаһының юғары формаһы булып тора тип әйтәләр. Беҙҙең партиябыҙ хәҙер дә етәксе партияға әйләнде. Беҙгә ҙур яуаплылык һәм ҙур бурыстар йөкмәтә. Коммунистәр — эшселәр синыфының алдынғы өлеше. Был отряд хеҙмәтсән массаларҙың етәксеһе ролен һәр вакыт һәм бөтә ерҙә, эштә күрһәтергә тейеш. Был почетлы ролде беҙҙең партиябыҙ президентебеҙ Клемент Готвальд етәкселегендә намыҫ менән үтәр тигән ышанысты белдерәм.

Йыйылыш аҙағында Чехословакия коммунистәр партияһының генеральный секретаре Рудольф Сланский ҙур телмәр менән сығыш яһаны.

Йыйылыш коммунистәр һәм социал-демократтар партияларын Чехословакияның берҙәм партияһына берләштереү тураһында манифест кабул итте.

Бөгөн, тип әйтелә манифеста, эшселәр синыфының иң якшы улдарының һәм кыҙҙарының хыялдары үтәлә. Чехословакия эшселәренең ике партияһы — социал-демократтар һәм коммунистәр партиялары Чехословакияның берҙәм бөйөк коммунистәр партияһына берләшәләр. Беҙ үҙебеҙҙең байрактарыбыҙҙа фәнни социализмде бөйөк нигеҙләүселәрҙең — Маркс, Энгельс, Ленин, Сталин исемдәрен горурлык менән алып барырбыҙ.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙарының Варшава кәңәшмәһендә кабул ителгән белдереүенә откликтәр

ПРАГА, 27 июнь. (ТАСС). Прага газеталары һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙарының Варшава кәңәшмәһен СССР һәм халык демократияһы илдәренең бөтә донъяла оҙакка һуҙылған һәм демократик тыныслык өсөн көрәш эшендә яңы вкладтары итеп бер кунелдән баһалайҙар.

Германия буйынса көнбайыш державаларҙың Лондон кәңәшмәһе, тип яҙа «Руде Право» газетаһының махсус хәбәрсеһе Симон, тыныслык коралы ел, ә агрессия планы, немец рейхына ярҙам итеүсе план, немец ревизионизмең һәм һуғыш андырыусыларҙы яклаусы булып тора. Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙарының Варшава кәңәшмәһендәге [illegible] тыныслык, имиңселек һәм демократия планы. Лондон [illegible] һына еҫтенлек биргәнлектән [illegible] ҙыра. Варшава кәңәшмәһенсә белдереүе кәңәшмәлә катнашыусы бөтә илдәрҙең имиңселегенә ышыта, сөнки ул немец ревизионизмына карши, Польшаның Одерҙан һәм Нейсселәге сиктәрен тәүгәр [illegible] Германияның демилитаризациялауҙы һәм демократлашыуын талап итә.

Берлиндә акса алмаштырыуҙың беренсе көнө

БЕРЛИН, 25 июнь. (ТАСС). Совет хәрби администрацияһының 111-се номерле приказына ярашлы рәүештә, Германиялағы совет оккупациялык зонаһының халык йәшәгән бөтә пункттарында һәм Берлиндә иҫке аксаларҙы [illegible] яңы аксаларға алмаштырыу үтте. Совет зонаһында 10 сәғәттән 20 сәғәткә тиклем меңгә якын акса алмаштырыу пункттары эшләне. Уларҙа бөтә Берлин халыктары үҙҙәренең аксаларын алмаштыра алырҙар ине.

Ләкин акса алмаштырыуҙың беренсе көнөндә шундай хәл билдәләнде, көньяк секторҙарҙа йәшәүсе халыктар [illegible] акса алмаштырыу [illegible] «немец маркалары» алмаштырыу башланыуына [illegible] ине. Көнбайыш секторҙарҙа йәшәүсе халыктары [illegible] вакытында алырға [illegible] күрһәтеү өсөн Америкалылар бөгөн көньяк районда урамдарын броневиктәр менән демонстратив рәүештә һағалайоштороулар.

Совет секторында акса алмаштырғанда азык карточкалары күрһәтеү талап ителде, ә көнбайыш зоналарҙа, белдереүҙәргә карағанда, паспорттар күрһәтеү кәрәк. Лакин, көнбайыш секторҙарға [illegible] акса алмаштырыу вакытында [illegible] күрһәтеүҙәрен, ихтыяж шуның менән аңлатырға кәрәк.

Яуаплы редактор: Г. В. ГУЗАНОВ.

К. А. ТИМИРЯЗЕВ ИСЕМЕНДӘГЕ БАШКОРТ ГОСУДАРСТВО ПЕДАГОГИЯ ИНСТИТУТЫ

1948—1949 укыу йылына педагогия һәм укытыусылар институтына

СТУДЕНТТӘР КАБУЛ ИТӘ.

Педагогия институты (укыу срогы 4 йыл) урта мәктәптәр һәм техникумдар өсөн, укытыусылар институты (укыу срогы 2 йыл) ете йыллык мәктәптәр өсөн укытыусылар әҙерләй.

Педагогия һәм укытыусылар институтына урта белемле, 17—35 йәштәге һәр ике енес граждандары кабул ителәләр. Урта мәктәпте алтын һәм көмөш медалдәр алып тамамлаусылар, һәм шулай ук, 1948 йылда педагогия училищеһен айырыуса якшы тамамлаусылар экзаменһеҙ кабул ителәләр. Инеүселәрҙең башкалары, инә торған факультетенә һәм бүлектәренә карап, түбәндәге фәндәрҙән экзамендәр бирергә тейештәр:

а) педагогия институтының физика-математика факультетенә һәм укытыусылар институтының физика-математика бүлегенә инеүселәр — математика, физика, химия, рус теле һәм әҙәбиәтенән;

б) педагогия институтының тел һәм әҙәбиәт, сит ил телдәре факультетенә һәм укытыусылар институтының тел һәм әҙәбиәт бүлегенең башкорт бүлегенә — башкорт теле, СССР халыктары тарихе, география, һәм шулай ук, инглиз, француз, немец телдәренең береһенән;

в) педагогия институтының тәбиғәтте өйрәнеү факультетенә һәм укытыусылар институтының тәбиғәт-география бүлегенә инеүселәр —физика, химия, рус теле һәм әҙәбиәтенән;

г) педагогия институтының тарих һәм география факультеттәренә һәм укытыусылар институтының тарих бүлегенә инеүселәр — СССР халыктары тарихенән, география, рус теле һәм әҙәбиәтенән.

Кабул итеү өсөн һынауҙар 1 августан 20 августка тиклем дауам итәсәк.

Ғариза бирeүсенең кайһы факультеткә, йәки кайһы бүлеккә инергә теләүе күрһәтелгән булырға тейеш.

Ғариза директор исеменә автобиография, урта мәктәпте тамамлау тураһында аттестат (подлинниктә), өс фото карточка, хәрби учетта тороусыларға — хәрби хеҙмәткә нисбәте тураһында справка кушып бирелә.

Институтка алынған кешеләргә стипендия һәм районлан килеселәргә дейөм торлак йәки квартира аксаһы бирелә.

Институттың ашханаһы бар.

Педагогия һәм укытыусылар институтында ситтән тороп укыу ойошторолған. Бында сит ил телен өйрәнеү факультетенән башка, иыланда күрһәтелгән бөтә факультеттәр һәм бүлектәр бар. Ситтән тороп укыуға инеү шарттары шул ук институттарға инеү шарттары менән бер.

Адрес: Өфө калаһы, Гоголь урамы, 11-се номерле йорт. Телефондар: 2-63-70; 2-63-[illegible]

Дирекция.

Редакция адресе: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-72-26.

П00198 Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 1450

Бөтә илдәрҙең пролетарийҙәре, берләшегеҙ!

КЫҘЫЛ БАШҠОРТОСТАН

ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә һәм Өфө кала комитеттәре, Башҡорт АССР-ы Верховный Советы һәм депутаттарының Өфө кала Советы органы.

29-сы йыл сыға

1948 йыл
№ 129
30
июнь
шаршамбы

хаҡы 20 тин

«СССР Министрҙәр Советы, ауыл хужалығын артабан күтәреү, хеҙмәттең етештереүсәнлеген күтәреү, общественный хужалыкты, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың доходтарын үҫтереү бурыстары колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон байтаҡ яҡшыртыуҙы һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыуҙы талап итәләр, тип иҫәпләй.»

(СССР Министрҙәр Советы карарынан).

Колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын нығытырға

Большевиктар партияһы етәкселегендә илебеҙҙә еңгән колхоз юлошто хеҙмәтсән крәҫтиәндәрҙең иждади көсөн үҫтерергә киң юл асты һәм уларҙың ялы рәүештә социалистик общественны хужалыкка [illegible]. Колхоз крәҫтиәндәренең һәм [illegible] бөтә көстәрен бирен, фидаҡәр рәүештә [illegible] общественный хужалығында хеҙмәт итә. Хеҙмәт илар өсөн намыҫлыҡ, батырлыҡ һәм геройлыҡ эше булып әүерелде. Колхоз крәҫтиәндәре хәҙер һуғыштан һуңғы ауыл хужалығын аякка баҫтырыу һәм артабан үҫтереү өсөн үҙҙәрен аямай эшләйҙәр.

Ауылда социалистик ярыштың киң колас йәйеүе, уның дөйөм халк характеры алыуы колхоз крәҫтиәндәрендә социалистик аңдың үҫеүен күрһәтә. Улар дөйөм государство интересен, общественный интересте барынан да алға куялар, колхоздың общественный хужалығын нығытыу, колхоз тырышып эшләү юлы менән мул тормошко өлгәшеү мөмкин икәнлеген аңлайҙар.

Республикабыҙҙың данлы колхозсылары — Социалистик Хеҙмәт Геройҙары, ордендар һәм медалдәр менән наградланыусылар, бөтә илдән алдынғы крәҫтиәндәр менән бер рәттән, юғары урожай алыу һәм социалистик [illegible] күтәреү өсөн көрәштә хеҙмәткә коммунистик караштың тулы өлгәләрен күрһәтәләр.

Колхоздо социалистик хеҙмәт дисциплинаһы көндән-көн нығый. Ләкин әле колхоздарҙа артелдең дөйөм эшенә катнашырға теләмәүсе ялгаи колхозсылар ҙа бар. Был ялгаи колхозсылар колхозда бөтә [illegible] менән файҙаланалар, ләкин колхоз эшенә катнашмайҙар, хеҙмәт көнө минимумын үтәмәйҙәр, намыҫлы эшләүсе колхозсыларҙың иҫәбенә йәшәйҙәр. Улар ауыл хужалыҡ продукттары менән спекуляция менән шөғөлләнәләр.

Дөрөҫ, был ялгаи колхозсылар дөйөм колхозсыларҙың бик аҙ өлөшөн тәшкил итәләр, ләкин улар һәр бер колхозда тип әйтерлек бар әле. Улар колхоз производствоһына бик ҙур зыян килтерәләр һәм колхозда хеҙмәт дисциплинаһын таркаталар.

Колхозда хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн, иң беренсенән, бындай ялгаи колхозсыларға, ялҡауҙарға, рвачтар менән кискен көрәш алып барырға кәрәк. Сөнки улар колхозда намыҫлы булып йәшәүҙән һәм бөтә эшкә ярҙамсы булыусылар [illegible] комасаулык итәләр.

Большевиктар партияһы һәм Совет Хөкүмәте колхозсыларҙың интерестарын һәр һаклап, колхозда хеҙмәт дисциплинаһын бөтә юлдар менән нығыта. Бөйөк Сталинсе Уставы колхоз дисциплинаһын нығытыу өсөн бөтә мөмкинселектәрҙе тәьмин итә. Колхоз эшенән баш тартыусы ялҡауҙарға ҡаршы көрәштә артель Уставында күрһәтелгән бөтә сараларҙы кулланырға кәрәк.

Партия һәм хөкүмәт 1942 йылда «Колхозсылар өсөн хеҙмәт көнө минимумын арттырыу тураһында» карар сығарҙы. ВКП(б) Үҙәк Комитетының февраль Пленумы һуғыштан һуңғы осорҙа был карарҙарҙы тормошка ашырырға [illegible]. Бер генә колхозда ла билдәләнгән хеҙмәт көнө минимумын үтәмәгән колхозсы булмаһын.

Ләкин республикабыҙ колхоздарында хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу эшенә [illegible] көрәш юк әле. 15 июнгә [illegible] хеҙмәт көнө минимумын [illegible] беренсе осоро тулды. [illegible] карамастан, колхозсылар [illegible] осор өсөн хеҙмәт көнө минимумын эшләмәгән колхозсылар һаны күп әле. Мәҫәлән, Бүздәк районының 60 колхозында 346 колхозсы минимум хеҙмәт көнө эшләмәгән. Шулай булыуға карамастан, колхозда эшләмәүселәргә карата карта сарлар күрелмәй. Мишкә районының 100 колхозында 559 кеше, Баймаҡ районының 38 колхозында 335 кеше минимум хеҙмәт көнө эшләмәгән. Бындай хеҙмәт дисциплинаһын бозоусыларға карата кискен [illegible] талап итә.

Ошо көндәрҙә СССР Министрҙәр Советы «Колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон яҡшыртыу, етештереүсәнлеген күтәреү һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыу саралары тураһында» карар кабул итте. Был карар колхоздарҙа хеҙмәт ойоштороу-хужалыҡ артабан нығытыу, уны [illegible] боевой программа була.

СССР Министрҙәр Советы колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороу буйынса мөһим [illegible] лар билдәләй, колхоздарҙа производство бригадаларын тулыуы, звенолар төҙөү, индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщина дөрөҫ бурыстарын куя. Карар колхоздарҙа доход бүлеүҙе бөтә һәм звеноларҙың урожай [illegible] иҫәпкә алып үткәрергә [illegible] бригадаларҙың [illegible] звеноларҙың хеҙмәт көнө [illegible] хеҙмәт көнө ала, ә түбән урожай алыусы бригадаларҙың, звеноларҙың хеҙмәт көнө кәм [illegible]. Хеҙмәт өсөн түләүҙең бындай системаһы уравниловканы бөтә[illegible] һәм колхозсыларҙың [illegible] дәре менән иҫәпләнгән бик [illegible].

Шикһеҙ, был карар хеҙмәт дисциплинаһын нығытыуҙа ла иң мөһим карар булып торасаҡ, сөнки ул намыҫ менән эшләүсе колхозсыларҙың интерестарын ныҡ һаҡлай һәм колхоз тормошона [illegible] менттарға каты удар яһай.

Партия һәм совет ойошмаларына, колхоз председателдәренә колхозда ялҡаулар, рвачтар һәм спекулянттар менән көрәш мәсьәләһен кискен куйырға кәрәк. Колхозда хеҙмәт дисциплинаһын тарткаусыларҙың, «өрәм тамаҡ» — ялҡауҙарҙың ысын йөҙөн асып, улар колхоздың артабан үҫешенә комасаулаусылар икәнлеген бөтә колхозсыларға күрһәтергә кәрәк.

Колхозсылар артель хужалығының тулы хокуклы хужалары, улар хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу менән бик ныҡ кыҙыҡһыныусылар. Шуның өсөн хеҙмәт дисциплинаһын бозоусыларға каршы көрәште бөтә колхозсыларҙың бурысы итеп куйырға кәрәк.

Колхозда хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу — колхозды ойоштороу-хужалыҡ ягынан нығытыуҙың мөһим шарты. Был эш һәр ваҡыт бөтә колхоз общественносеның иғтибар үҙәгендә булырға тейеш.

Йылдың икенсе яртыһы иҫәбенә

— Йылдың яртыһы — 7 ноябргә тиклем — тау оборудованиеһы заводы [illegible] коллективы, инженер-техник работниктары [illegible] ярты йыллыҡ [illegible] 8 көн алда үтәнеләр.

Войлок, Казаков һәм Кожевльс [illegible] коллективтары үҙҙәренең стахановсы хеҙмәттәре менән заводтың уңышына өлгәшеүен тәьмин иттеләр.

Заводта 24 стахановсы эшсе икенсе йыллыҡ нормаларын үтәүҙе тамамланылар. Улар араһында формовщик В. Н. Мартынов һәм токарь Васинкин пландарын 167 процентка үтәнеләр.

Цех беренселекте алыуға ирешә

ЧЕРНИКОВСК. (Телефон аша). Машиналар төҙөү заводының [illegible] Красногорский начальник булған [illegible] коллективе, Октябрь алды социалистик ярышына [illegible] йыллыҡ [illegible] байрам [illegible] июнь һәм август айы пландарын 105 процентка үтәргә йөкләмә алдылар.

Ярыш һөҙөмтәһендә цех коллективы заводта беренселекте алыуға өлгәшә. Цехтың Шипоров, Поломорев һәм Легтярев [illegible] графиктан ике-өс көн алда баралар.

СССР МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ

Колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон яҡшыртыу, етештереүсәнлеген күтәреү һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыу саралары тураһында

СССР Министрҙәр Советы, ауыл хужалығын артабан күтәреү, хеҙмәттең етештереүсәнлеген күтәреү, общественный хужалыкты, колхоздарҙың һәм колхозсыларҙың доходтарын үҫтереү бурыстары колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон байтаҡ яҡшыртыуҙы һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыуҙы талап итәләр, тип иҫәпләй.

Хеҙмәтте ойоштороу һәм хеҙмәт өсөн түләү эшендә колхоздар тарафынан ҙур ыңғай тәжрибә тупланған булыуы менән бер рәттән, СССР Министрҙәр Советы күп колхоздарҙа был эштә ҙур етешһеҙлектәр йәшәп килә, ул етешһеҙлектәр колхозсылар хеҙмәтенең етештереүсәнлеген артабан күтәреүгә һәм колхоздарҙың общественный хужалығын үҫтереүгә комасаулайҙар, тип күрһәтеп үтә.

Колхозсыларҙың хеҙмәтен ойоштороу һәм уның өсөн түләү эшендә төп етешһеҙлектәр түбәндәгеләрҙән тора:

колхоздарҙа ерҙән файҙаланыуҙа эйәһеҙлек йәшәп килә, был эйәһеҙлек баҫыусылыҡ бригадаларына сәсеү әйләнеше баҫыуҙарында участкаларҙың кайһы бер ваҡытта беркетелмәүенән тора, был хәл урожайҙы күтәреүгә комасаулай. Күп колхоздарҙа бригадалар составының өҙлөкһөҙ үҙгәреп тороуы бөтөрөлмәгән, бригадаға беркетелгән етештереү средстволары йыш кына хәлдә бригаданан ситтә, бригадирҙың рөхсәтенән тыш, файҙаланыла.

Бындай практика бригаданың нормаль рәүештә эшләүен бозға һәм бригадалағы эштең торошо өсөн бригадирҙың яуаплылығын кәметә. Байтаҡ колхоздарҙа хеҙмәтте звенолап ойоштороу системаһы — был үҙенең яҡшы яғы менән танылған тәжрибә, етерлек дәрәжәлә кулланылмай;

эшләп сығарыуҙың иҫкергән кәм нормаларын, шулай уҡ хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән бик юғары эш расценкаларын кулланыу. Күп колхоздар бер нисә йылдар буйынса инде эшләп сығарыу нормаларын кайтанан карап сыҡмайҙар һәм шул сәбәпле колхозсылар хеҙмәтенең етештереүсәнлеген үҫтереүҙә ирешелгән өлгәшеүҙәрҙе иҫәпкә алмайҙар; икенсе дәрәжәле ярҙамсы эштәр өсөн хеҙмәт ҡы байтаҡ хәлдәрҙә төп баҫыу эштәренә караганда һәм малсылыҡ өлкәһендәге эштәргә карағанда юғарыраҡ түләнә, был хәл ауыл хужалығы эштәрен үткәреүҙе һуҙыуға һәм хеҙмәт көндәрен нығытыуға килтерә;

колхоздарҙа тигеҙләүселек (уравниловка) таралған, бындай йәшәп килгәндә колхоздарҙың [illegible]тары бригадаларҙың, звеноларҙың, фермаларҙың һәм айырым [колхоз]сыларҙың эш һөҙөмтәләрен иҫәпкә алмайынса бүленә, шул сәбәпле, намыҫ менән яҡшы эшләгән колхозсылар, колхозсылар араһындағы рвач һәм намыҫһыҙ элементтәр менән сағыштырғанда, файҙалы булмаған хәлдә тороп калалар;

хеҙмәт көндәрен тотоноуҙы планлаштырыуҙың һәм уларҙы тотоноу өҫтөнән контролдең торошо кәнәғәтләнмәҫлек булыу. Колхоздарҙа хеҙмәт көндәрен тотоноуҙы планлаштырыу йыш кына хәлдәрҙә тотош колхозда бер йыл эсендә тотоласаҡ хеҙмәт көндәренең йәки, иң яҡшы тигәндә, баҫыусылыҡ һәм малсылыҡ өсөн тотоласаҡ хеҙмәт көндәренең дөйөм һанын билдәләү менән сикләнә. Колхоздарҙың күпселегендә хеҙмәт көндәренең тотолоуы өҫтөнән контроль алып барылмай, хеҙмәт көндәрен дөрөҫ тотонмаған өсөн колхозда бер[әү] ҙә яуаплы булып тормай, шуның һөҙөмтәһендә колхоз доходтарын бүлеүҙә хеҙмәт көнөнөң әһәмиәте кәмей;

колхоздарҙа ваҡ группалы һәм индивидуаль сдельщина сөрлек дәрәжәлә кулланылмай. Эш башынан (сдельно) түләү урынына йыш кына хәлдә көнләкләп түләү кулланыла. Бригадала һәм звенола һәр бер колхозсының эше айырым рәүештә иҫәпкә алынмай, үтәлгән эш тотош иҫәпкә алына һәм эштә катнашкан бөтә колхозсыларҙың һанына карап тигеҙ итеп бүленә, быйыл арҡаһында эшләп сығарыу нормаларын күтәреү менән колхозсыларҙың кыҙыҡһыныуы һәм үтәлә торған эштең сифаты өсөн яуаплылыҡ кәмей;

йәшәп килгән тәртип буйынса колхоз председателдәренең хеҙмәтенә, общественный малдар һаны үрсеүҙе иҫәпкә алмайынса, сәсеү майҙандарының күләмдәренә карап кына түләү уларҙа общественный малсылыкты үҫтереү өсөн материаль яҡтан кыҙыҡһыныу тыуҙырмай һәм колхоздарҙың бөтә хужалығына зарарлы рәүештә тәьҫир итә. Бригадирҙарға һәм малсылыҡ фермаларының мөдирҙәренә хеҙмәт көндәре яҙылғанда уларҙың эштәренең күләме һәм һөҙөмтәһе иҫәпкә алынмай, хеҙмәткә түләүҙең был тәртибе дөрөҫ түгел, сөнки ул бригадирҙарҙың һәм малсылыҡ фермалары мөдирҙәренең яҡшы эшләүҙәре өсөн стимул бирмәй, ә күп кенә хәлдәрҙә был работниктарға бригада һәм малсылыҡ фермаһы колхозсылары башкара торған эштәрҙә туранан-тура катнашыуҙан ситләшергә мөмкинлек бирә.

Колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон һәм уға түләүҙе яҡшыртыу, һәм хеҙмәт көндәрен яҙыуҙа тәртип урынлаштырыу маҡсатында, ССР Союзы Министрҙәр Советы карар итә:

I.

Колхоздарҙа хеҙмәтте ойоштороу һәм хеҙмәт көндәрен тотоноуҙы планлаштырыу тураһында

1. [illegible] хеҙмәтен ойоштороуҙың формаһы булған даими производство бригадаларын бөтә саралар менән нығытыу колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон яҡшыртыу эшендә бик мөһим бурыс булып тора, тип иҫәпләргә.

Колхоздарҙың правлениеләренә ер участкаларын кәмендә тулы сәсеү әйләнеше срогына, сабынлыҡтарҙы, шулай уҡ эш малын, ауыл хужалығы машиналарын, транспорт средстволарын һәм кәрәкле булған производство караралтыларын баҫыусылыҡ бригадаларына беркетергә һәм был бригадаларҙың составын үҙгәреп тороуға (текучесть) юл куймаҫка тәкдим итергә. Административ һәм хеҙмәтләндереүсе персоналды кыҫкартыу иҫәбенә бригадалар составын тулыландырырға һәм икенсе дәрәжәле хужалыҡ эштәрендә файҙаланыла торған һәм ултырып йөрөү өсөн файҙаланыла торған тартыу көстәрен бригадаларға бирергә.

Производство бригадаһына беркетелгән инвентарь, ауыл хужалығы машиналары, тартыу көсө һәм транспорт средстволары бригадир карамағында булалар һәм уның рөхсәтенән тыш йәки колхоз правлениеһенең карарынан башка бригаданан тыштағы эштә файҙаланыу өсөн алына алмайҙар, тип билдәләргә.

2. Колхоз правлениеләренә трактор эштәрен бригадалар буйынса планлаштырған саҡта баҫыусылыҡ бригадаларында хеҙмәтте һәм тартыу көсөн тулыһы менән файҙаланыуҙы күҙҙә тоторға, шуның менән бригадаларҙа эштәрҙең үҙ ваҡытында үтәлеүен тәьмин итергә тәкдим итергә.

3. Пропаш, техник, йәшелсә культураларын һәм орлоҡсолоҡ участкаларын, ә мөмкин булған урындарҙа, бөртөклө ашлыҡ культураларын да звеноларға беркетеү өсөн колхоздарға производство бригадаларының эсендә йәшәп килгән звеноларҙы нығытырға һәм яңы звенолар ойошторорға кәңәш бирергә.

Бригадаларҙағы бөтә звеноларҙа бер тигеҙ нагрузка булдырыу һәм сәсеүлектәрҙе звенолар араһында сиктән артыҡ бүлгеләп биреүгә юл куймау өсөн, звеноларға культураларҙы кәмендә бер йыллыҡ срокҡа, уларға хеҙмәт һалыу күләмен, эшкәртеү һәм урожай йыйнау сроктарын иҫәпкә алып, беркетергә. Звеноларға яровой культуралар өсөн булған участкаларҙы тунға һөрөүҙән элек, ә ужым культуралары өсөн — пар һөргәнгә тиклем бүлеп биреүҙе тәьмин итергә.

4. Звенолағы бөтә колхозсылар менән бер тигеҙ эшләп барған хәлдә, звено башлығы колхозсыларҙы эшкә урынлаштырыуҙы ойоштора, билдәләнгән эш көнө тәртибенең звено члендәре тарафынан ерено еткерелеүен, эшләп сығарыу нормаларының үтәлеүен һәм эштең сифатын күҙәтеп бара, звено члендәре үтәгән эштәрҙе бригадир кабул итеп алғанда катнаша.

5. Һәр бер бригада һәм звено буйынса хеҙмәт көндәре һәм уларға беркетелгән ауыл хужалығы культуралары участкаларынан алынған урожай айырым рәүештә иҫәпкә алына, тип билдәләргә.

6. Колхоздарҙың правлениеләренә баҫыу эштәренең сифатына каты контроль куйырға, һәр бер колхозсы тарафынан үтәлгән эштәрҙең производство бригадаларының бригадирҙәре тарафынан көн һайын иҫәпкә алынып барыу, һәм колхозсы тарафынан эшләнелгән хеҙмәт көндәрен уның хеҙмәт кнәгәһенә үҙ ваҡытында яҙып барыу тәртибен ерено еткерергә тәкдим итергә; колхоз председателе бригадаларҙан эште аҙнаға кәмендә бер тапҡыр кабул итеп барырға тейеш.

7. Колхоздарға бригадаларҙа һәм звеноларҙа бөтә ауыл хужалығы эштәрен, кағыҙә рәүешендә, индивидуаль һәм ваҡ группалы сдельщина нигеҙендә үткәрергә, шуның менән бер урында өйөлөп эшләүҙе һәм һәр бер колхозсының общественный хеҙмәттә катнашлығын эйәһеҙләндереүҙе (обезличка) бөтөрөргә кәңәш бирергә.

8. Колхоздарҙың правлениеләренә кәрәк булған хәлдәрҙә хеҙмәткә булдыҡлы колхозсыларҙың общественный хеҙмәттә катнашлыҡ итеүҙәре тураһындағы мәсьәләне ай һайын тикшереп сығырға һәм хеҙмәт дисциплинаһын боҙоусы ялҡау колхозсыларға карата тәьҫир итеү саралары күрергә кәңәш бирергә.

Район башкарма комитеттәрен колхозсыларҙың колхоз производствоһында катнашыуҙарын, хеҙмәт көндәренең закон менән билдәләнгән мәжбүри минимумының улар тарафынан үтәлеүен систематик рәүештә тикшерең барырға һәм колхоздарҙа хеҙмәт дисциплинаһын нығытыу өсөн кәрәкле саралар күрергә мәжбүр итергә.

9. Колхоздарҙың правлениеләренә йыллыҡ производство планын һәм керем-сығым сметаһын төҙөү менән бер үк ваҡытта хужалыҡтың тармаҡтары буйынса, һәр бер культура йәки бер төрлө культураларҙың группаһы буйынса — һәр бер бригада һәм һәр бер звено өсөн, мал төрҙәре буйынса — һәр бер малсылыҡ фермаһы өсөн, һәр бер ярҙамсы предприятие буйынса, һәр бер объект төҙөлөшө буйынса, шулай уҡ эске хужалыҡ эштәренә һәм административ һәм хеҙмәтләндереүсе персонал хеҙмәтенә түләү өсөн хеҙмәт көндәрен тотоноу планын төҙөргә кәңәш бирергә.

Тотош колхоз буйынса ла, шулай уҡ айырым бригадалар, звенолар һәм малсылыҡ фермалары буйынса ла хеҙмәт көндәрен тотоноу пландарын сәсеү майҙандары, урожай һәм малсылыкты үҫтереү буйынса государство планы менән билдәләнгән заданиелар нигеҙендә, колхоздарҙа кабул ителгән эшләп сығарыу нормалары һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән эш расценкалары нигеҙендә төҙергә һәм уларҙы колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында раҫларға. Һәр бер бригада һәм звено өсөн хеҙмәт көндәре тотоноу планын төҙөгәндә эштәрҙең механизацияланыу кимәлен, тупраҡтарҙың төрләнгән һәм сүпләнгәнлеген, предшедственниктәрҙе һәм сәсәлә[illegible]тораҡ культураларҙың сорт яғынан үҙенсәлектәрен иҫәпкә алырға. Колхоздарға хеҙмәт көндәрен тотоноу пландарын төҙөү эшенә бригадирҙарҙы, звено башлыктарын һәм алдынғы колхозсыларҙы ылыктырырға.

10. СССР Ауыл хужалығы Министерствоһын һәм уның урындағы органдарын хеҙмәт көндәрен тотоноу пландарын төҙөүҙә колхоздарға ярҙам күрһәтеүҙе тәьмин итергә, шулай уҡ хеҙмәт көндәренең дөрөҫ яҙылып барыуы һәм хеҙмәт көндәрен тотоноу пландарының үтәлеүе өҫтөнән контролде тормошка ашырырға, уны был эшкә ауыл хужалығы специалистәрен һәм инструктор-бухгалтерҙарҙы ылыктырыу юлы менән үткәрергә мәжбүр итергә.

11. Колхоздарҙың правлениеләренә һәм ревизия комиссияларына хеҙмәт көндәренең дөрөҫ яҙылыуына контроль куйырға һәм кварталға кәмендә бер тапҡыр, шулай уҡ йыл аҙағында доходтарҙы бүлеү алдынан һәр бер бригада, звено, ферма буйынса, культуралар, төҙөлөш объекттары буйынса һәм административ-хеҙмәтләндереүсе персонал хеҙмәтенә түләү буйынса яҙылған хеҙмәт көндәренең һанын үтәлгән эш күләменә карата планда күҙҙә тотолған хеҙмәт көндәренең һаны менән сағыштырып сығырға кәңәш бирергә. Хеҙмәт көндәренең яҙылыуын тикшергән ваҡытта хеҙмәт көндәренең артыҡ тотолоуының, шулай уҡ планда күҙҙә тотолған агротехника һәм зоотехника саралары үтәлмәүенең сәбәптәрен билдәләргә һәм тейешле булған [illegible] тороуын белергә. Тикшереү һөҙөмтәләре тураһында тейешле тәкдимдәр менән колхозсыларҙың дөйөм йыйылышына доклад яһарға.

12. Колхоздарҙың правлениеләренә: бригадирҙарҙың һәм ферма мөдирҙәренең эшләп сығарыу нормаларын үҙ белдектәре менән кәметеүҙәре, расценкаларҙы арттырыуҙары, үтәлгән эштәрҙе дөрөҫ үлсәмәүҙәре һәм дөрөҫ иҫәпкә алмауҙары һөҙөмтәһендә уларҙың хеҙмәт көндәрен яңылыш яҙғанлыҡтары беленһә, шулай уҡ насар сифатлы үтәлгән һәм яңынан эшләнергә тейешле булған эштәр өсөн хеҙмәт көндәре яҙылғанлығы беленһә, бындай хәлдәрҙә яңылыш яҙылған хеҙмәт көндәрен улар законһыҙ яҙылған колхозсыларҙан списать итергә тейештәр. Бынан тыш, хеҙмәт көндәрен яңылыш яҙған бригадирҙан йәки ферма мөдиренән, колхоз правлениеһенең карары менән, 5 хеҙмәт көнөнә тиклем списать итергә.

13. Бригадаларға һәм звеноларға беркетелгән участкаларҙа йәки фермаларҙа урожайҙы күтәреүгә йәки һаҡлап алып калыуға һәм малсылыкты үрсетеүгә булышлыҡ итә торған, ләкин хеҙмәт көндәрен тотоноу планы менән каралмаған, өҫтәмә эштәр үткәреү кәрәк булған хәлдә колхоз председателе был эштәрҙең үтәлеүен рөхсәт итергә тейеш. Өҫтәмә эштәрҙе үткәреү өсөн тотолған хеҙмәт көндәренең һаны һуңынан колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында раҫланырға тейеш.

14. Үтәлгән эштәрҙе һәм хеҙмәт көндәренең тотолоуын иҫәпкә алыу кнәгәһенең формаһын 1-се номерле Кушымтала күрһәтелгәнсә раҫларға.

СССР Госпланының Үҙәк Статистика Управлениеһына һәм СССР Ауыл хужалығы Министерствоһына колхоз счетоводствоһы тураһындағы Инструкцияға [illegible] һалыҡ срок эсендә кәрә[illegible] мәләр индерергә кушыр[illegible].

СССР Госпланы Үҙәк Ста[тисти]ка Управлениеһен[illegible] тельство[illegible] управлениеһе [illegible] эштәрҙе һәм хеҙмәт кө[ндәрен] тотолоуын иҫәпкә алы[illegible] ике ай срок эсендә б[illegible]рырға һәм СССР [illegible] Үҙәк Статистика [illegible] һәм СССР Ауыл [illegible] нистерствоһы [illegible] ләнгән нормалар[illegible] колхоздарҙы был [illegible] мин итергә мәжбүр [illegible].

(Дауамы 2-се бит[тә])

СССР МИНИСТРҘӘР СОВЕТЕНДӘ

Колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон яҡшыртыу, етештереүсәнлеген күтәреү һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыу саралары тураһында

II.

Эшләп сығарыу нормалары һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән эш расценкалары тураһында

(Дауамы. Башы 1-се биттә).

15. СССР Хөкүмәте әргәһендәге Колхоз эштәре Советы һәм СССР Ауыл хужалығы Министрлығы тарафынан тапшырылған эшләп сығарыуҙың өлгө нормаларын һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән берҙәм расценкаларҙы 2-се номерлы Кушымтала күрһәтелгәнсә раҫларға.

Республикалар Министрҙәре Советтарына, край һәм өлкә башҡарма комитеттарына был Ҡарарҙа күҙҙә тотолмаған, ләкин республиканың, крайҙың, өлкәнең колхоздарында ҡулланылып торған эштәр өсөн кәрәк булған ҡалда өҫтәмә рәүештә эшләп сығарыуҙың өлгө нормаларын һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән расценкалар эшләргә рөхсәт итергә.

16. Республикаларҙың Министрҙәр Советтарына, край һәм өлкә башҡарма комитеттарына эшләп сығарыуҙың өлгө нормалары һәм берҙәм расценкалары нигеҙендә түбәндәгеләрҙе эшләргә мәжбүр итергә:

а) колхоздарҙа ҡулланылып килгән эшләп сығарыу нормаларын, колхоздар эшендәге үҙенсәлектәрҙе һәм алдынғы колхоздар тәжрибәһен иҫәпкә алып, хеҙмәт етештереүсәнлеге ирешелгән кимәле менән сағыштырып, ҡарап сығыуҙы ойоштороу;

б) хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән эш расценкаларын ҡарап сығыуҙы, ә СССР Ауыл хужалығы Министрлығы [illegible] хеҙмәт өсөн юғарырак түләүҙе һәм икенсе дәрәжәләге эштәргә ҡарата түләүҙе түбәнәйтеүҙе тәьмин итергә.

Хеҙмәт етештереүсәнлегенең юғарырак кимәленә ирешкән колхоздарға был Ҡарар менән ҡулланылған эшләп сығарыу нормаларын юғарылатырға кәңәш бирергә.

Нормаларҙы эшләүҙә ауыл хужалығы специалистарын, бригадирҙарҙы, звено башлыҡтарын һәм алдынғы колхозсыларҙы ылыҡтырырға.

Эшләп сығарыу нормаларын һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән эш расценкаларын колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарында раҫларға һәм, контроль тәртибендә, ауыл районы башҡарма комитеттарына тикшереп сығырға.

17. Колхоздарҙа йәшәп килгән эшләп сығарыу нормаларының үтәлешен был һайын тикшереп үтергә һәм уларҙы тейешенсә ҡарап сығырға кәрәк тип иҫәпләргә. Хеҙмәт етештереүсәнлегенең ирешелгән кимәле менән сағыштырғанда был үҙләнкән нормалар түбән нормалар булып сыҡҡан, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышының ҡарары менән яңы нормалар юғарылатырға.

18. СССР Министрҙәр Советы әргәһендәге ОГИЗ-ға эшләп сығарыуҙың өлгө нормаларын һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән берҙәм расценкаларын бөтә колхоздар өсөн ике айлыҡ срок эсендә басып сығарырға, ә СССР Ауыл хужалығы Министрлығына улар менән бөтә колхоздарҙы тәьмин итеүҙе мәжбүр итергә.

III.

Игенселектә колхозсыларҙың хеҙмәте өсөн түләү тәртибе тураһында

19. Юғарырак урожайҙар алған [illegible] урожай [illegible] планы арттырып үтәлгән [illegible] бригадаларға [illegible] колхозсыларға [illegible] хеҙмәт көндәре [illegible] тупландырып [illegible]

БРИГАДАЛАР БУЙЫНСА:

а) бригадаға үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планын үтәп еткермәһә, [illegible] [illegible] планды утәп еткерелмәгән һәр бер проценте өсөн [illegible] хеҙмәт көндәренең [illegible] списать итергә [illegible]

б) үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планын [illegible] еткерелмәгән һәр бер проценте өсөн [illegible]

в) үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планын [illegible] был культураға йәки бер төрлө культуралар группаһына тотолған бөтә хеҙмәт көндәренең [illegible]

ЗВЕНОЛАР БУЙЫНСА:

а) звено үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар буйынса урожай йыйыу планын [illegible] үтәп еткермәһә, [illegible] хеҙмәт көндәренең [illegible]

б) үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планын арттырып үтәгән һәр бер процент өсөн [illegible] хеҙмәт көндәренең [illegible] проценты күләмендә [illegible] хеҙмәт көнө [illegible]

утәп етермәһә, планды утәп еткерелмәгән һәр бер проценте өсөн [illegible] списать итергә [illegible]

в) үҙенә беркетелгән культура йәки бер төрлө культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планын арттырып үтәгән звеноға [illegible] культураға тотолған хеҙмәт көндәренең [illegible] 25 проценттан артыҡ булмаҫҡа тейеш.

20. Әгәр колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы, колхоздың конкрет производство шарттарын иҫәпкә алып, бригадаларҙың һәм звеноларҙың эш һөҙөмтәләрен улар өсөн билдәләнгән пландың үтәлеү дәрәжәһе менән тикшереп үтә ала торған урожай алыу планын [illegible] бригада йәки звено [illegible] хеҙмәт көндәре яҙыу йәки списать итеү [illegible]

Бригада йәки звено буйынса билдәле бер культуранан йәки бер төрлө культуралар группаһынан урожай йыйыу планының үтәлеүе, был культура йәки культуралар группаһы буйынса урожай йыйыу планының колхоз буйынса урта үтәлеүе [illegible] бригада йәки звеноның өҫтәмә рәүештә [illegible] бригаданан [illegible] хеҙмәт көндәрен яҙыу йәки списать итеү [illegible] урожай [illegible] 25 проценттан артыҡ булмаҫҡа тейеш.

21. Бригадаларға йәки звеноларға хеҙмәт көндәрен өҫтәмә яҙыу йәки списать итеү буйынса бөтә расчеттар улар тарафынан билдәле культуралар йәки бер төрлө культуралар группаһына тотолған хеҙмәт көндәренең [illegible] тотолоу, планның үтәлеше тикшергәндән һуңында колхозсыларҙың дөйөм йыйылышында раҫланған хеҙмәт көндәренең [illegible] ҡарап үткәрергә.

22. Бригадаға йәки звеноға беркетелгән культуралар буйынса улар тарафынан алынған урожай өсөн колхозсыларға хеҙмәт көндәрен өҫтән яҙыу йәки списать итеү билдәле культура йәки бер төрлө культуралар группаһы өсөн һәр бер колхозсы тарафынан эшләнгән хеҙмәт көндәренең бөтә һанына пропорциональ рәүештә үткәрелә; йыл буйына хеҙмәт көндәренең мәжбүри минимумын иҫтибарға алырлыҡ сәбәптәр булмайынса тороп, эшләмәгән колхозсыларға бригада йәки звенола хеҙмәт көндәре өҫтәмә рәүештә яҙылмай; хеҙмәткә булдыҡлы булмаған колхозсыларға һәм 16 йәшкә тиклем булған йәш үҫмерҙәргә бригадалар йәки звенолар алған урожай өсөн хеҙмәт көндәре списать итеү итемәй, тип билдәләргә.

23. Сәсеүлектәр стихия ҡазалары сәбәпле һәләк булһа һәм был Госстрах акттары менән раҫланған булһа, бындай хәлдәрҙә урожай йыйыу планын үтәмәгән өсөн бригадаларҙан һәм звеноларҙан хеҙмәт көндәре списать итемәй, тип билдәләргә.

24. Бригадаларҙың һәм звеноларҙың колхозсыларына йәшелсә һәм техник культуралар буйынса хеҙмәт көндәрен яҙыуы, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышының ҡарары менән, урожайҙың һәр бер центнеры өсөн хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән расценкалар буйынса үткәрелергә мөмкин, тип иҫәпләргә.

Бер центнер урожай өсөн расценкаларҙы бригада йәки звено өсөн раҫланған урожай йыйыу планын, ҡабул ителгән эшләп сығарыу нормаларын һәм расценкаларын, шулай уҡ план менән ҡаралған урожай өсөн үтәлгән эштәр өсөн кәрәкле булған хеҙмәт көндәренең тотолоуын иҫтибарға алып билдәләргә, кәрәк булған ваҡытта был расценкаларҙы йыл аҙағында фактик үтәлгән эштәр буйынса дөрөҫләп сығырға.

25. Звеноның эшенә етәкселек иткән өсөн звеновод был культуралар буйынса булған эштәрҙә бөтә звено члендәре тарафынан эшләнгән хеҙмәт көндәренең һанынан 2—3 проценте күләмендә өҫтәмә рәүештә хеҙмәт көндәре яҙыу тураһында [illegible] билдәләргә. Звеноводҡа өҫтәмә хеҙмәт көнө яҙыуҙы ай һайын башҡарырға.

26. Тейешле булған өҫтәмә түләүҙең ҡайһы хәлдәрҙә колхозсыларға уҙ ваҡытында бирелмәүен юл ҡуймаҫлыҡ хәл итеп иҫәпләп, республикаларҙың Министрҙәр Советтарына, край һәм өлкә башҡарма комитеттарына колхозсыларға тейешле булған өҫтәмә түләүҙең уҙ ваҡытында бирелеүен һәр ваҡыт контроль ҡылыуҙы мәжбүр итергә.

27. Бригада йәки звено тарафынан урожай йыйыу планы арттырып үтәлгән өсөн колхозсыларға өҫтәмә түләү биргән ваҡытта был урожайҙы алыу өсөн ағымдағы йылда тотолған һәм тикшереүҙән һуң түләү өсөн ҡабул ителгән бөтә хеҙмәт көндәре, йәғни бригада члендәренә, был участкала эшләгән тракторсыларға һәм башҡа колхозсыларға яҙылған хеҙмәт көндәре иҫәпкә алынырға тейеш, тип билдәләргә.

IV.

Малсылыҡта колхозсыларҙың хеҙмәте өсөн түләү тәртибе тураһында

28. Хеҙмәттең ойошторолошон һәм уның өсөн түләүҙе артабан яҡшыртыу, хеҙмәт көндәрен яҙыуҙа тәртип булдырыу һәм малсылыҡтан [illegible] продукты алыу [illegible] һаның арттырыу өсөн колхозсыларҙың материаль яҡтан ҡыҙыҡһыныуҙарын күтәреү маҡсаты менән колхоздарға малсылыҡта эшләүсе колхозсыларҙың хеҙмәте өсөн түләүҙе улар тарафынан һауып алынған һөттөн, ҡырҡып алынған йөндөң һанына, йәш малдарҙы тыуҙырып, үҫтереп алыуҙарына, эш малының һәм продукт малының тереләй үлсәүен үҫтереүгә һәм көрлөгөнә ҡарап билдәләргә кәңәш бирергә. Ошоға ярашлы рәүештә колхоздарға, колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарының ҡарары менән, түбәндәге өлгө нагрузка нормаларын, сдельный расценкаларҙы һәм хеҙмәт көндәрен яҙыу тәртибен индерергә кәңәш бирергә:

ЙЫЛҠЫСЫЛЫҠТА:

а) өлкән аттарҙы хеҙмәтләндереүсе конюхҡа 10 ат беркетергә һәм атты тәрбиәләү эше өсөн уға һәр бер баш ат өсөн айына 3 хеҙмәт көнө яҙырға. Бынан тыш, таҙа хәлендә тыуҙырып алған һәр бер ҡолон өсөн 10 хеҙмәт көнө һәм инәһенән айырғанса тәрбиәләп үҫтергән һәр бер ҡолон өсөн 15 хеҙмәт көнө яҙырға;

б) ӧс йәшкә еткәнгә тиклем йәш йылҡыны хеҙмәтләндереүсе конюхҡа 12 баш йылҡы беркетергә һәм һәр бер баш йылҡы өсөн уға айына 2,5 хеҙмәт көнө яҙырға;

в) йылҡы өйөрҙә аҫыралған ваҡытта, 4 кешенән торған табунщиктәр бригадаһына 80-дән алып 100-гә тиклем бейә йәки өс йәшкә тиклем булған йылҡы беркетергә. Бейәләрҙе хеҙмәтләндереүсе табунщиктәр бригадаһына һаҡлап ҡалған һәр бер баш мал өсөн айына бер хеҙмәт көнө яҙырға, бынан тыш таҙа хәлендә тыуҙырып алған һәр бер ҡолон өсөн 5 хеҙмәт көнө һәм инәһенән айырғанға тиклем тәрбиәләп үҫтергән һәр бер ҡолон өсөн 8 хеҙмәт көнө яҙырға; йәш йылҡы малын хеҙмәтләндереүсе табунщиктәр бригадаһына һаҡлап үҫтергән һәр бер баш мал өсөн айына 1,3 хеҙмәт көнө яҙырға;

г) йәш тоҡом ҡолондарын хеҙмәтләндереүсе конюхҡа 6 тоҡом ҡолоно беркетергә һәм һәр бер баш мал өсөн уға айына 5 хеҙмәт көнө яҙырға;

д) тороҡторо у айғырҙарын хеҙмәтләндереүсе конюхҡа һәр бер айғыр өсөн айына 4 хеҙмәт көнө яҙырға һәм уға беркетелгән айғырҙан тарафынан тороҡторолған һәр бер бейә өсөн, ул ҡулдан тороҡторолған ваҡытта, буаҙлығы беленгәс, 1,5 хеҙмәт көнө яҙырға;

е) өлкән конюхҡа йәки өлкән табунщикка үҙенә беркетелгән аттарҙы хеҙмәтләнд[illegible] хеҙмәт көндәрен конюхтар һәм табунщиктәр өсөн билдәләнгән расценкалар һәм нормалар буйынса яҙырға. Бынан тыш, конюхтарҙың эшенә етәкселек иткән өсөн уға айына 5-тән алып 10-ға тиклем хеҙмәт көнө яҙырға;

ж) өлкән аттарҙы һәм йәш йылҡыны хеҙмәтләндереүсе конюхтарға йылҡы һарайҙа аҫыралған ваҡытта, яҡшы көрлөктә тотолған һәр бер ат өсөн ай һайын өҫтәмә рәүештә бер хеҙмәт көнө яҙырға, ә көрлөгө уртасанан түбән булған һәр бер ат өсөн бер хеҙмәт көнөн списать итергә; йылҡы өйөрҙә аҫыралғанда яҡшы көрлөктә тотолған һәр бер ат өсөн өҫтәмә рәүештә 0,5 хеҙмәт көнө яҙырға, ә көрлөгө уртасанан түбән булған һәр бер ат өсөн 0,5 хеҙмәт көнөн списать итергә.

Ҡонюхтарға хеҙмәт көндәрен яҙыу йәки списать итеү һәр айҙың аҙағында аттарҙы ҡарау һәм уларҙың көрлөгөн билдәләү акты нигеҙендә үткәрелә, был акт колхоз председателе, ревизия комиссияһы председателе, зоотехник йәки ветеринар работниктәр тарафынан төҙөлә һәм уға улар ҡул [illegible] лар, тип билдәләргә;

з) баҫыусылыҡ бригадаһы бригадиренә бригадаға беркетелгән уртаса көрлөктәге һәр бер ат өсөн айына 0,2 хеҙмәт көнө, [illegible] көрлөктәге һәр бер ат өсөн [illegible] хеҙмәт көнө һәм тыуҙырып инәһенән айырғанға тиклем тәрбиәләп үҫтергән һәр бер [illegible] өсөн 3 хеҙмәт көнө яҙырға.

Ат менән эшләүсегә (өзөй) эшләү өсөн уға беркетелгән һәр бер ат өсөн, аттың көрлөгө уртаса булғанда, айына 3 хеҙмәт көнө, көрлөгө яҡшы булғанда [illegible] хеҙмәт көнө яҙырға һәм уға беркетелгән бейәнән тыуҙырып алып инәһенән айырғанға тиклем тәрбиәләп үҫтергән һәр бер ҡолон өсөн 10 хеҙмәт көнө яҙырға.

Баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙарына һәм ат менән эшләүселәргә көрлөгө уртаса[illegible] түбән булған аттар өсөн [illegible] хеҙмәт көндәре яҙмаҫҡа. Атты һамыттан, ыңғырсаҡтан һуҡтырып [illegible] өсөн йәки башҡа төрлө зарарланған өсөн ғәйепле кешеләрҙән аттың тик торған һәр бер көнө өсөн ат һауыҡҡанға тиклем 2 [illegible] хеҙмәт көнө списать итергә; бейә ҡолон һалған өсөн ғәйепле кешеләрҙән — 20 хеҙмәт көнөн списать итергә.

МӨГӨҘЛӨ ЭРЕ МАЛ ФЕРМАЛАРЫНДА:

а) һыйыр һауыусы-ҡараусыға (доярка-скотница) [illegible] баштан алып 14 башҡа тиклем һыйыр беркетергә. Һыйыр һауыусыға-ҡараусыға хеҙмәт көндәрен түбәндәге күләмдәрҙә яҙырға:

уға беркетелгән һыйырҙар группаһынан һауып алынған һәр бер 100 литр һөт өсөн [illegible] хеҙмәт көнөнән алып 1,8 хеҙмәт көнөнә тиклем һәм аҙбарҙа аҫыраған осорҙа — 2,2 хеҙмәт көнөнән алып 3,2 хеҙмәт көнөнә тиклем яҙырға;

уға беркетелгән һыйырҙарҙан һәм таналарҙан тыуҙырып алған һәр бер таҙа быҙау өсөн 7 хеҙмәт көнө, ә тыуҙырып алып 15—20 көнлөк булғанса тәрбиәп үҫтергән һәр бер быҙау өсөн [illegible] хеҙмәт көнө яҙырға. Быҙауҙы һыйыр һауыусы-ҡараусы тәрбиәп үҫтергәндә уға хеҙмәт көнө быҙау ҡараусылар өсөн билдәнгән расценкалар буйынса яҙ[illegible]

б) мал ҡараусы-көтөүсегә (скотник-пастух) 30 һыйыр беркетергә. Мал [illegible] ҡараусыға-көтөүсегә хеҙмәт көн[illegible] түбәндәге күләмдәрҙә яҙырға:

уға беркетелгән һыйырҙарҙан һауып алынған һәр 100 литр һөт өсөн мал көт[illegible] йөрөтөлгән осорҙа 0,4—0,5 х[illegible] көнө һәм аҙбарҙа тотолған [illegible] осорҙа — 0,7—1,0 хеҙмәт көнө яҙы[illegible]

уға беркетел[illegible] һыйырҙарҙан һәм таналарҙан [illegible] тыуҙырып алынған һәр бер таҙа бы[illegible] өсөн — 2—3 хеҙмәт көнө я[illegible]

в) быҙау ҡа[illegible] ыға 20—25 быҙау беркетерг[illegible] быҙау ҡараусыға быҙауҙарҙың [illegible] тереләй ауырлығы һәр бер 10 [illegible] грамға артҡан өсөн айына 0[illegible]3 хеҙмәт көнө, ә быҙауҙар үл[illegible] арылмаған хәлдә — һәр бер [illegible] быҙауға 0,9—1,3 хеҙмәт көн[illegible] рға;

г) йәш м[illegible] ҙы йәки көрәйтергә ебәрел[illegible] ки һимертергә ҡуйылған ма[illegible] ҙы хеҙмәтләндереүсе мал [illegible] ыға-көтөүсегә 30—50 баш м[illegible] беркетергә.

Йәш м[illegible] ҡараусыға-көтөүсегә малд[illegible] тереләй ауырлығының һәр бер килограмға артыуы өсөн ай[illegible] 0,8—1,0 хеҙмәт көнө яҙырғ[illegible] мал үлсәнмәйенсә барғанда [illegible] бер баш мал өсөн 0,5—0,7 х[illegible] көнө яҙырға; бынан тыш, [illegible] оз правлениеһе тарафынан [illegible] ләнгән сроктарҙа тороҡторо[illegible] ғана һыйырҙан тыуҙырып алы[illegible] һәр бер таҙа быҙау өсөн 2—[illegible] мәт көнө яҙырға.

К[illegible] ергә һәм һимертергә ҡуйы[illegible] малдарҙы ҡараусыға-көтө[illegible] малдың тереләй ауырлығы [illegible] һәр бер 10 килограмға артҡ[illegible] өсөн айына 0,8—1,2 хеҙмәт [illegible] мал үлсәп барылмаһа — һәр баш мал өсөн 0,6—0,8 көнө яҙырға.

Үлсәп барылмаған хәлдә ҡараусыға, йәш малдарҙы, [illegible] тергә һәм һимертергә ҡуйған [illegible] арҙы ҡараусыға-көтөүсегә [illegible] гө уртасанан юғары булған [illegible] бер баш мал өсөн 0,5 хеҙмәт [illegible] яҙырға, ә көрлөгө уртасанан [illegible] булған һәр бер баш мал [illegible] 0,3 хеҙмәт көнөн списать [illegible] ргә.

Малдың көрлөгө өсөн хеҙмәт [illegible] көндәрен яҙыу һәм списать итеү [illegible] һәр айҙың аҙағында, колхоз председателе, ревизия комиссияһы председателе, зоотехник йәки ветеринар работник тарафынан төҙөлгән һәм улар ҡул ҡуйған акт нигеҙендә үткәрелә;

д) тороҡторо у үгеҙҙәрен хеҙмәтләндереүсе мал ҡараусыға (скотник) 3—4 баш үгеҙ беркетергә. Үгеҙҙе тәрбиәләү эше өсөн мал ҡараусыға һәр бер үгеҙ өсөн айына 4 хеҙмәт көнө һәм уға беркетелгән үгеҙҙәр тарафынан тороҡторолған һәр бер һыйыр йәки тана һыйыр өсөн, уларҙың буаҙлығы беленгәс—1,5 хеҙмәт көнө яҙырға;

е) бер үк ваҡытта төрлө йәштәге малдарҙы хеҙмәтләндереүсе мал ҡараусыға-көтөүсегә хеҙмәт көндәрен малдың тейешле группаларын ҡараусы-көтөүсе өсөн күҙҙә тотолған расценкалар һәм нормалар буйынса һөт һауып алған өсөн, йәш малдар тәрбиәләп үҫтергән өсөн, йәш малдарҙың һәм көрәйтеүгә ҡуйылған малдарҙың үлсәүе һәм көрлөгө артҡан өсөн яҙырға;

ж) эш үгеҙҙәрен хеҙмәтләндереүсе мал ҡараусыға хеҙмәтләндергән һәр бер эш үгеҙе өсөн айына 1,8—2 хеҙмәт көнө яҙырға.

ҺАРЫҠСЫЛЫҠ ФЕРМАЛАРЫНДА:

а) йомшаҡ йөнлө һарыҡтарҙың 400—600 баштан торған йәки ярым тупаҫ йөнлө һарыҡтарҙың 500—700 баштан торған йәки ярым тупаҫ йөнлө һәм смушковый һарыҡтарҙың 600—800 баштан торған һарыҡтар көтөүен хеҙмәтләндереүсе өлкән чабан-бригадир, подпасок, третьяк (икенсе подпасок) һәм арбич составындағы чабандар бригадаһына:

инәһенән айырғанса тәрбиәләп үҫтергән һәр бер һарыҡ бәрәсе өсөн йомшаҡ йөнлө тоҡом бәрәсе өсөн 1,2—1,5 хеҙмәт көнө һәм башҡа тоҡом бәрәсе өсөн 1,0—1,3 хеҙмәт көнө яҙырға;

йомшаҡ йөнлө һарыҡтарҙан ҡырҡып алынған һәр бер килограмм йөн өсөн 0,35 хеҙмәт көнө һәм башҡа тоҡом һарыҡтарынан ҡырҡып алынған һәр бер килограмм йөн өсөн 0,30 хеҙмәт көнө яҙырға;

элита һәм 1-се сорт смушкаға һуйылған һәр бер бәрәс өсөн 1,5 хеҙмәт көнө, башҡа сорт смушкалар өсөн һуйылған бәрәс өсөн 0,8 хеҙмәт көнө яҙырға;

бригадаға беркетелгән һарыҡтарҙан һауып алынған һәр бер 100 литр һөт өсөн 1,5—2,0 хеҙмәт көнө яҙырға;

б) инәләренән айырылған йәш һарыҡтарҙың, беселгән тәкәләрҙең 600—800 баштан торған көтөүен хеҙмәтләндереүсе чабандар бригадаһына:

һаҡлап үҫтергән һәр бер баш йәш һарыҡ өсөн айына 0,10—0,12 хеҙмәт көнө, һаҡлап үҫтергән һәр бер беселгән тәкә өсөн айына 0,04 хеҙмәт көнө, ҡырҡып алынған һәр бер килограмм йөн өсөн 0,30—0,35 хеҙмәт көнө яҙырға;

в) көрәйтеүгә ҡуйылған һарыҡтар көтөүен хеҙмәтләндереүсе чабандар бригадаһына 600—800 баш һарыҡ беркетергә; бригадаға: малдың тереләй ауырлығы һәр бер 10 килограмға артҡаны өсөн 0,8—1,0 хеҙмәт көнө, һарыҡтар үлсәнмәй торған хәлдә һәр бер һарыҡ өсөн айына 0,10—0,12 хеҙмәт көнө, ҡырҡып алынған һәр бер килограмм йөн өсөн 0,30 хеҙмәт көнө яҙырға.

Колхоздарға чабандар бригадаһына яҙылған хеҙмәт көндәрен бригада члендәре араһында түбәндәгесә бүлергә кәңәш бирергә: бригада 4 кешенән торғанда: өлкән чабанға-бригадирға — 35 процент, подпасокҡа — 27 процент, третьякҡа (икенсе подпасокҡа) — 23 процент, арбичҡа — 15 процент; бригада 3 кешенән торғанда: өлкән чабанға-бригадирға — 40 процент, подпасокҡа — 35 процент, икенсе подпасокҡа — 25 процент; бригада 2 кешенән торғанда: өлкән чабанға-бригадирға — 65 процент, подпасокҡа — 35 процент бүлергә;

г) һарыҡтарҙың бәрә торғоу йәшендәге группаларын хеҙмәтләндереүсе чабандарға-көтөүселәргә 75 һарыҡ беркетергә, [illegible] тоҡомо һарыҡтарын бәрәстәрә [illegible] нан 50 һарыҡ беркетергә, чабан-көтөүсегә хеҙмәт көндәрен түбәндәге күләмдәрҙә яҙырға: тыуҙырып алып инәһенән айырғанға тиклем тәрбиәләп үҫтергән һәр бер һарыҡ бәрәсе өсөн, аҫыраған һарыҡтарҙың тоҡомона ҡарап, 1,4-тән алып 1,7-гә хәтле хеҙмәт көнө, һәр бер һаҡланып килгән өлкән һарыҡ өсөн һәм инәһенән айырылғанса һаҡланып килгән бер баш бәрәс өсөн ай аҙағында 0,15 хеҙмәт көнө һәм ҡырҡып алынған һәр бер килограмм йөн өсөн 0,30—0,35 хеҙмәт көнө яҙырға;

д) һарыҡтарҙың тороҡторо у йәшендәге бөтә группаларын хеҙмәтләндереүсе чабандар бригадаһына һәм чабандарға һарыҡтарҙың бәрәсләү, һауыу һәм йөнөн ҡырҡыу осоронда ярҙамға был эштәргә үҙҙәре көрәү өсөн колхозсылар бүлергә һәм уларға; сакманщиктарға улар менән бергә һаҡлап алып килгән һәр бер 10 бәрәс өсөн көнөнә 0,2—0,4 хеҙмәт көнө, һарыҡ һауыусыларға һауып алған һәр бер 10 литр һарыҡ һөтө өсөн 0,6—[illegible] хеҙмәт көнө, йөн ҡырҡыусыларға ҡырҡып алынған һәр бер 10 килограмм йөн өсөн 0,3—0,4 хеҙмәт көнө яҙырға.

СУСҠАСЫЛЫҠ ФЕРМАЛАРЫНДА:

а) сусҡа ҡараусыға бәрәстәре менән 7—8 инә сусҡа беркетергә, ә сусҡа балалары 3—4 айлыҡ ваҡытынан алып махсус рәүештә бүленгән, сусҡа ҡараусы тарафынан һимертелә торған хәлдә нагрузканы 10—12 инә сусҡаға тиклем арттырырға.

Сусҡа ҡараусыларға:

тыуҙырып алған һәм инәһенән айырғанға тиклем тәрбиәләп үҫтергән һәр бер таҙа сусҡа балаһы өсөн 3 хеҙмәт көнө һәм тереләй ауырлығы кәмендә 12 килограмм килгән һәр бер инәһенән айырылған сусҡа балаһы өсөн 4 хеҙмәт көнө яҙырға;

һимертергә ҡуйылған сусҡаларҙың һәм инәһенән айырылғас тәрбиәләп үҫтерерлә торған сусҡа балаһының тереләй ауырлығы һәр бер 10 килограмға артҡан өсөн бер хеҙмәт көнө яҙырға;

б) сусҡа ҡараусыға [illegible] сусҡаларҙы яҡшы хәлдә [illegible] шы көрлөктә ҡарап тотҡан һәр бер сусҡа өсөн айына 3 хеҙмәт көнө яҙырға, бесел[illegible] сусҡаларҙың көрлөгө уртасанан [illegible] булғанда хеҙмәт көнө [illegible] маҫҡа.

(Аҙағы 3-сө биттә).

СССР МИНИСТРҘӘР СОВЕТЫНДА

Колхоздарҙа хеҙмәттең ойошторолошон яҡшыртыу, етештереүсәнлеген күтәреү һәм хеҙмәт өсөн түләүҙе тәртипкә һалыу саралары тураһында

(Аҙағы. Башы 1-се һәм 2-се биттәрҙә).

Ҡошсолоҡ фермаларында:

а) ҡош ҡараусыға (птичница) үҫтән ҡош: 500 баш тауыҡ, йәки 300 баш өйрәк, йәки 100 баш ҡаҙ, йәки 100 баш күркә һәм себештәр: 800 баш тауыҡ себеше, йәки 400 баш өйрәк бәпкәһе, йәки 300 баш ҡаҙ бәпкәһе, йәки 300 баш күркә балаһы беркетергә.

Ҡош ҡараусыға һаҡлап килгән һәр бер баш тауыҡ өсөн айына самаһы менән 5 хеҙмәт көнө, өйрәк өсөн — [illegible] хеҙмәт көнө, күркә һәм ҡаҙ өсөн — 0,20 хеҙмәт көнө яҙып торырға;

б) йыл аҙағында ҡош ҡараусыға уның тарафынан фактик алынған продукция өсөн хеҙмәт көндәрен түбәндәге расценкалар буйынса тамам рәүештә яҙып ҡуйырға:

һәр бер йөҙ тауыҡ йомортҡаһы өсөн	[illegible]	хеҙмәт көнө
» » өйрәк »	»	»
» » күркә »	»	»
» » ҡаҙ »	»	»

тәрбиәләп үҫтерелгән, ит өсөн тапшырылған, һуйылған, һатылған йәки фермала ҡалдырылған һәр бер баш тауыҡ өсөн — 0,5 хеҙмәт көнө, өйрәк өсөн — 0,6 хеҙмәт көнө, ҡаҙ һәм күркә өсөн — 0,9 хеҙмәт көнө яҙырға;

баҫҡан ҡош (наседка) тарафынан сығарылған һәр бер 10 баш тауыҡ себеше өсөн — 0,8 хеҙмәт көнө, һәр бер 10 баш өйрәк бәпкәһе өсөн 1,5 хеҙмәт көнө, һәр бер 10 баш күркә балаһы өсөн 2,5 хеҙмәт көнө һәм һәр бер 10 баш ҡаҙ бәпкәһе өсөн 3 хеҙмәт көнө яҙырға;

в) әгәр ҙә ҡош ҡараусыға йыл буйына хеҙмәт көндәре продукция өсөн тейешле булғанға ҡарағанда кәмерәк яҙылған булһа, уға йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәре менән продукция өсөн тейешле булған хеҙмәт көндәре араһындағы айырма күләмендә өҫтәмә рәүештә хеҙмәт көндәре яҙыла;

әгәр ҡош ҡараусыға йыл буйына хеҙмәт көндәре алған продукция өсөн тейешле булғанға ҡарағанда күберәк яҙылған булһа, тейешле булғандан артыҡ яҙылған хеҙмәт көндәре унан списать ителмәй, ләкин списать ителгән хеҙмәт көндәренең һаны ҡош ҡараусыға йыл эсендә яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең 25 процентынан артыҡ булмаҫҡа тейеш;

[illegible] һәм унан артығыраҡ ҡош ҡараусыһы булған ҡошсолоҡ фермаларында ҡош ҡараусыларҙың береһе ферма мөдире итеп билдәләнә, ул ҡош ҡарау эшенән бушатылмай.

Ҡош ҡараусыларҙың эшенә етәкселек иткән өсөн ҡошсолоҡ фермаһының мөдиренә айына 5-тән алып 10-ға тиклем хеҙмәт көнө яҙыла.

д) ҡоштарҙың йомортҡа һалыуҙарына индивидуаль учет алып барыла торған тоҡом ҡошсолоғо фермаларында ҡош ҡараусыларға нагрузка нормаларын 30 процентҡа кәметергә, ә алынған продукция өсөн расценкаларҙы 50 процентҡа күтәрергә.

29. Малсылыҡ фермалары бәләкәй булған һәм малдың бер группаһы буйынса нагрузка нормаһы менән билдәләнгән күләмдәрҙә малдарҙы колхозсыларға беркетеүе мөмкин булған колхоздарға малсылыҡта эшләүсе колхозсыларға төрлө группалағы малдарҙы беркетергә һәм уларға мал ҡарау эштәре менән бергә [illegible] тә бер үк ваҡытта мөмкин булған башҡа эштәр бирергә кәңәш итергә. [illegible] фермаларҙа эшләүсе [illegible] хеҙмәт көндәрен [illegible] ҡоштарҙың тейешле [illegible] өсөн ошо Ҡарар менән билдәләнгән расценкалар буйынса яҙырға.

30. Колхоздарға малсылыҡ бригадаларын тәжрибәле колхозсылар менән комплектовать итергә һәм һәр бер малсылыҡ бригадаһына продукты малын, [illegible] кәрәкле инвентарҙе һәм [illegible] ҡаралтыларын беркетергә кәңәш бирергә.

31. Республикаларҙың министрҙар Советтәрен, край һәм өлкә башҡарма комитеттәрен [illegible] беркетеүҙең өлгө нормаларын һәм расценкалар нигеҙендә һәр бер колхозда 1948 йылға малсылыҡта алған продукция һәм башҡа күрһәткестәре өсөн нормалар һәм хеҙмәт көндәре менән иҫәпләнгән расценкалар эшләүҙе һәм раҫлауҙы ойоштороорға, был эшкә малсылыҡ специалистарын, ферма мөдирҙәрен һәм алдынғы колхозсыларҙы ылыҡтырырға мәжбүр итергә. Нормаларҙы һәм расценкаларҙы эшләү менән бер үк ваҡытта [illegible] һөт һауып алыу өсөн малдың [illegible] төүлектә йәрәтелгән һәм [illegible] ҡуйылған осорҙарына ҡарап [illegible] торған төрлө расценкаларҙың ҡулланылыуҙың календарь срогын билдәләргә.

[32]. Колхоздарҙа малдарҙы колхозсыларға беркетеү буйынса йә[illegible] эшләнгән нормаларҙың үтәлешен йыл һайын тикшереп сығырға һәм ҡайтанан ҡарап сығырға кәрәк, тип иҫәпләргә. Әгәр нормалар малдарҙан продукты алыу буйынса ирешелгән күрһәткестәргә һәм малсылыҡ фермаларында эштәрҙең механизацияһына [illegible] булып сыҡһалар, бындай колхоздарҙа, дөйөм йыйылыштарҙың ҡарары буйынса, был нормаларға хеҙмәттең етештереүсәнлеген үҫтереүҙе тәьмин итә торған үҙгәрештәр индерергә.

V.

Колхоз председателдәренең, бригадирҙәренең, ферма мөдирҙәренең, малсылыҡ мөдирҙәренең һәм счетоводтарының (бухгалтерҙәренең) хеҙмәте өсөн түләү тураһында

33. Колхоз председателдәренең ауыл хужалығы культураларынан юғары урожай алыу, общественный малды үрсетеү һәм аҡса доходтарын арттырыу өсөн материаль яҡтан ҡыҙыҡһыныуҙарын күтәреү маҡсатында колхоздарға колхоз председателдәренең һәр бер айҙағы эше өсөн уларға түбәндәге күләмдәрҙә хеҙмәт көндәре яҙырға тәҡдим итергә:

а) колхозда сәсеү майҙаны (йәшелсә, емеш баҡсаларын һәм еләклектәрҙе лә индереп)

а) колхозда сәсеү майҙаны	Колхоз председателдәренә сәсеү майҙаны өсөн хеҙмәт көндәре яҙырға
100 гектарға хәтле булғанда	27
101 гектарҙан 300 гектарға хәтле булғанда	30
301 » 500 »	33
501 » 700 »	36
701 » 1000 »	42
1001 » 1500 »	48
1500 гектарҙан артыҡ булғанда	54

б) фермала малдар һаны

һыйырҙар	инә суҫҡалар	һарыҡтар	Колхоз председателдәренә һәр бер ферма өсөн хеҙмәт көндәре яҙырға
5-тән 10-ға хәтле булғанда	4-тән 6-ға хәтле булғанда	30-ҙан 100-гә хәтле булғанда	5
11 » 20	7 » 10	101 » 200	6
21 » 40	11 » 15	201 » 350	7
41 » 60	16 » [illegible]	351 » 550	[illegible]
61 » 80	21 » [illegible]	551 » 750	[illegible]
81 » 100	26 » 30	751 » 1100	11
101 » 150	31 » 35	1101 » 1600	14
150-нән артыҡ булғанда	35-тән артыҡ булғанда	1600-ҙән артыҡ булғанда	18

Әгәр колхоз күрһәтеп үтелгән мал төрө буйынса инә малдарҙың һанына ҡарата билдәләнгән минимумды үтәмәһә колхоз председателенең эше өсөн түләү минимумын [illegible] һәр бер ферма буйынса был пунктта күҙә тотолған хеҙмәт көндәре һанын 10 процентҡа кәметелергә тейеш, тип билдәләргә;

в) колхозда бейә[ләр] һаны: 5 башҡа тиклем булғанда — ике хеҙмәт көнө, 6-нан алып 15 башҡа тиклем булғанда — [illegible] хеҙмәт көнө, 16-нан алып 25 башҡа тиклем булғанда — алты хеҙмәт көнө, 26-нан алып 35 башҡа тиклем булғанда — һигеҙ хеҙмәт көнө, 36-нан алып 50 башҡа тиклем булғанда—ун хеҙмәт көнө, 51-ҙән алып 75 башҡа тиклем булғанда — ун өс хеҙмәт көнө һәм 75 баштан артыҡ булғанда—ун биш хеҙмәт көнө яҙырға;

г) колхозда ҡошсолоҡ фермаһы булып, уларҙа 200-гә хәтле тауыҡ йәки 100-гә хәтле өйрәк, йәки 50-гә хәтле ҡаҙ һәм күркә булғанда—3 хеҙмәт көнө, 200-ҙән 500-гә хәтле тауыҡ йәки 100-ҙән 250-гә хәтле өйрәк, йәки 50-нән 125-кә хәтле ҡаҙ һәм күркә булғанда — 5 хеҙмәт көнө, 500-ҙән 1000-гә хәтле тауыҡ йәки 250-нән 500-гә хәтле өйрәк, йәки 125-тән 250-гә хәтле ҡаҙ һәм күркә булғанда — 7 хеҙмәт көнө һәм 1000-дән артыҡ тауыҡ йәки 500-ҙән артыҡ өйрәк, йәки 250-нән артыҡ ҡаҙ һәм күркә булғанда — 10 хеҙмәт көнө яҙырға.

Немец оккупацияһына дусар булған районларҙың колхоздарына, колхозсыларҙың дөйөм йыйылыштарының ҡарары менән, колхоз председателдәренең хеҙмәте өсөн түләүҙең юғарыла күрһәтелгән тәртибен 1949 йылдың 1 ғинуарынан алып билдәләргә рөхсәт итергә.

34. Колхоз председателдәренә ай һайын түбәндәге күләмдәрҙә аҡсалата өҫтәмә түләү бирергә: йыллыҡ аҡсалата доходтың дөйөм суммаһы 10 мең һумға хәтле булғанда—25 һум, 10 меңдән 25 мең һумға хәтле булғанда — 50 һум, 25 меңдән 50 мең һумға хәтле булғанда — 75 һум, 50 меңдән 100 мең һумға хәтле булғанда — 125 һум, 100 меңдән 200 мең һумға хәтле булғанда — 150 һум, 200 меңдән 300 мең һумға хәтле булғанда — 175 һум, 300 меңдән 400 мең һумға хәтле булғанда 200 һум, 400 меңдән 500 мең һумға хәтле булғанда — 225 һум, 600 меңдән 700 мең һумға хәтле булғанда — 275 һум, 700 меңдән 800 мең һумға хәтле булғанда — 300 һум, 800 меңдән алып 900 мең һумға хәтле булғанда — 325 һум, 900 меңдән 1000 мең һумға хәтле булғанда — 350 һум, 1000 мең һумдан алып һәм унан юғары булғанда — 400 һум.

Йыллыҡ аҡса доходының иң һуңғы суммаһы билдәле булғанға хәтле колхоз председателдәренә өҫтәмә түләүҙең күләмен үткән йылдағы аҡса доходының суммаһынан сығып билдәләргә. Председателдәргә ай һайын билдәләнгән өҫтәмә түләүҙең 70 процентен бирен барырға.

Колхоз председателе менән аҡсалата өҫтәмә түләү буйынса аҙаҡҡы расчетты йыл аҙағында, йыллыҡ отчет колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы тарафынан раҫланғандан һуң һәм колхоздың йыллыҡ отчеты хеҙмәтсәндәр депутаттарының район Советы башҡарма комитеты тарафынан тикшерелгәндән һуң, яһарға.

35. Йәшәп килгән тәртип буйынса ауыл хужалығы культуралары урожайын йыйыу һәм малсылыҡтан продукты алыу планын колхоз арттырып үтәгәндә колхоз председателенә өҫтәмә рәүештә хеҙмәт көндәре яҙыла һәм аҡсалата өҫтәмә түләү бирелә, был тәртипте түбәндәге рәүештә һаҡлап ҡалдырырға:

Урожайлылыҡ һәм малсылыҡтан продукты алыу планын арттырып үтәгән өсөн	Планды арттырып үтәүҙең күләме		Айлыҡ түләүгә өҫтәмә рәүештә хеҙмәт көндәре һәм аҡсалата өҫтәмә түләү яҙыла
Уртаса бөтә бөртөклө культуралар буйынса	10	процентҡа хәтле	15 процент
	11—25	проц.	25 процент
	25	проценттән артыҡ	40 процент
Бөтә техник, йәшелсә культуралары һәм картуф буйынса	10	процентҡа хәтле	15 процент
	11—25	процент	25 процент
	25	проценттән артыҡ	40 процент
Ике һәм артығыраҡ малсылыҡ фермалары буйынса	10	процентҡа хәтле	15 процент
	11—25	процент	25 процент
	25	проценттән артыҡ	40 процент

Бынан тыш, малдың һәр бер төрө буйынса йыл аҙағына мал үрсетеү планын арттырып үтәүҙең һәр бер проценте өсөн колхоз председателдәренә өҫтәмә рәүештә [illegible] йыллыҡ өсөн уға төп түләү буйынса йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең бер проценте күләмендә хеҙмәт көндәре яҙырға.

Урожайлылыҡ планын арттырып үтәгән өсөн колхоз председателдәренә өҫтәмә түләү ошо Ҡарарҙың 35-се пунктында күрһәтелгән культуралар буйынса сәсеү планы үтәлгән шартта бирелә, тип билдәләргә.

37. Колхоздарға урожай йыйнау планын үтәп еткермәүҙең һәр бер проценте өсөн колхоз председателдәренән бөтә бөртөклө культуралар буйынса уртаса бер процент хеҙмәт көнөн списать итергә, техник культура буйынса — бер процент, йәшелсә культуралары буйынса — бер процент, һәр бер төрө буйынса үрсетеү планын һәм малдың һанын үрсетеү планын һәм һөт һауып алыу планын еткермәүҙең һәр бер проценте өсөн — бер процент хеҙмәт көнөн списать итергә кәңәш бирергә.

Ләкин колхоз председателенән списать ителергә тейешле булған хеҙмәт көндәренең һаны уға төп түләү буйынса йыл эсендә яҙылған хеҙмәт көндәренең 25 процентынан артырға тейеш түгел.

38. Колхоз председателдәренә, уларҙың эш стаждарына ҡарап, өҫтәмә рәүештә түбәндәге күләмдәрҙә хеҙмәт көндәре яҙырға: колхозда өсөнсө йыл эшләүселәргә —ай һайын яҙылған хеҙмәт көндәренең 5 проценте күләмендә, дүртенсе һәм бишенсе йыл эшләүселәргә — 10 процент күләмендә, биш йыл һәм артығыраҡ эшләүселәргә — 15 процент күләмендә.

39. Колхоз правлениеларына бригадирҙарҙың эш күләменә ҡарап, уларға ай һайын түбәндәге күләмдәрҙә хеҙмәт көндәре яҙырға кәңәш бирергә:

а) баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙарына ай һайын түбәндәге күләмдәрҙә хеҙмәт көндәре яҙырға:

Бригадаға сәсеү беркетелгән ерҙәр	Бөртөклө ашлыҡ колхоздарында	Бөртөклө һәм техник культуралар (оҙон етен, киндер, шәкәр сөгөлдөрө, тәмәке, махорка, күк һағыҙ, эфир-майлы, дарыу культуралары һәм башҡалар) сәсә торған колхоздарҙа
100 гектарға хәтле булғанда	30-ға хәтле	35-кә хәтле
101-ҙән 300 гектарға хәтле булғанда	35 »	40 »
301 » 500 »	40 »	45 »
501 » 700 »	45 »	50 »
700 гектарҙан артыҡ булғанда	50 »	55 »

б) мамыҡ сәсә торған колхоздарҙа баҫыусылыҡ бригадаларының бригадирҙарына:

Бригадаға беркетелгән сәсеүлектәге мамыҡ майҙаны	Ай һайын хеҙмәт көндәре яҙырға
20 гектарға хәтле булғанда	35-кә тиклем
21-ҙән 30 гектарға хәтле булғанда	40 »
31 » 40 »	45 »
41 » 50 »	50 »
51 » 60 »	55 »
60 гектарҙан артыҡ булғанда	60 »

в) йәшелсә бригадаларының бригадирҙарына:

Йәшелсә баҡсаларының майҙаны: һуғарылмай торғандары	һуғарыла торғандары	Ай һайын хеҙмәт көндәре яҙырға
10-дан 20 гектарға хәтле булғанда	5-тән 10 гектарға хәтле булғанда	30-ға тиклем
21 » 30 »	11 » 15 »	40 »
31 » 40 »	16 » 20 »	45 »
40 гектарҙан артыҡ булғанда	20 гектарҙан артыҡ булғанда	50 »

Йәшелсә бригадаларына шулай уҡ емеш баҡсалары һәм еләклектәр ҙә беркетелгән булһа, бындай хәлдәрҙә йәшелсә бригадаларының бригадирҙарына емеш-еләк үҫемлектәре ултыртылған һәр бер гектар өсөн өҫтәмә рәүештә ай һайын икешәр хеҙмәт көнө яҙырға.

40. Емеш һәм еләк баҡсаларының майҙандары байтаҡ ҙур күләмдә булған һәм уҙ алдына эш итеүсе баҡсасылыҡ бригадалары булған колхоздарҙа, был бригадаларҙың бригадирҙарына түбәндәге күләмдәрҙә түләргә:

Йәш емеш баҡсаларының һәм виноград баҡсаларының майҙаны	Емеш биреүсе баҡсаларҙың, виноград баҡсаларының һәм еләклектәрҙең майҙаны	Ай һайын хеҙмәт көндәре яҙырға
10-дан 20 гектарға хәтле булғанда	5-тән 10 гектарға хәтле булғанда	45-кә тиклем
20 гектарҙан артыҡ »	10 гектарҙан артыҡ »	50 »

41. Баҫыусылыҡ, йәшелсә һәм баҡсасылыҡ бригадаларының бригадирҙарына, уларҙың эш стаждарына ҡарап, өҫтәмә рәүештә түбәндәге күләмдәрҙә хеҙмәт көндәре яҙырға: колхозда өсөнсө йыл эшләүселәргә — ай һайын яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең 5 проценте күләмендә, дүртенсе һәм бишенсе йыл эшләүселәргә 10 процент күләмендә, биш йыл һәм артығыраҡ эшләүселәргә — 15 процент күләмендә.

42. Сәсеү планы үтәлгән хәлдә һәм бөтә бөртөклө, техник йәшелсә, мал аҙығы культуралары һәм картуф буйынса уртаса урожай алыу планы арттырып үтәлгән хәлдә бригадирҙарға культураларҙың группаларының һәр береһе буйынса урожай йыйып алыу планының арттырып үтәлгән һәр бер проценте өсөн төп түләү буйынса уларға йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәре һанынан берәр процент күләмендә өҫтәмә рәүештә, хеҙмәт көндәре яҙырға

Урожай йыйнау планы үтәлмәгән хәлдә юғарыла күрһәтелгән культуралар группаһының һәр береһе буйынса пландың үтәп еткерелмәгән һәр бер проценте өсөн бригадирҙарҙан берәр процент хеҙмәт көнө списать итергә, ләкин был списать ителгән хеҙмәт көндәре уға төп түләү буйынса йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең 25 процентынан артыҡ булмаҫҡа тейеш.

43. Колхозда инә малдарҙың һаны: йылҡысылыҡ фермаһында—20 бейәнән кәм булмағанда, мөгөҙлө эре малдар фермаһында — 35 һыйырҙан, суҫҡасылыҡ фермаһында — 20 инә суҫҡанан, һарыҡсылыҡ фермаһында — 800 һарыҡтан, ә түн тиреһе тоҡомо һарыҡтары фермаһында — 200 һарыҡтан кәм булмағанда колхоздарға малсылыҡ фермалары мөдирҙәре билдәләргә кәңәш бирергә.

Инә малдар һаны кәм булған колхоздарҙа малсылыҡ мөдирҙәрен билдәләргә һәм, фермаларҙың һанына һәм күләменә ҡарап, уларға айына 30-ҙан 50-гә хәтле хеҙмәт көнө яҙырға.

Колхоздың малсылыҡ мөдиренең малсылыҡҡа етәкселек итеү буйынса эш нагрузкаһы тулы булмаһа, бындай хәлдәрҙә уға хеҙмәтләндереү өсөн малдар беркетелә, ә малсылыҡҡа етәкселек иткәне өсөн уға өҫтәмә рәүештә айына 10-дан алып 15-кә хәтле хеҙмәт көнө яҙыла.

44. Ферма мөдиренә, уларҙың эш күләмдәренә ҡарап, хеҙмәт көндәрен айына түбәндәге күләмдәрҙә яҙырға:

а) йылҡысылыҡ фермаһының мөдиренә фермала:	
20—40 бейә булғанда	40-ҡа хәтле хеҙмәт көнө
40—60 »	45 »
60-тан артыҡ »	50 »
б) мөгөҙлө эре мал фермаһы мөдиренә фермала:	
35—50 һыйыр булғанда	40-ҡа хәтле хеҙмәт көнө
50—80 »	45 »
80-дән артыҡ »	50 »
в) суҫҡасылыҡ фермаһы мөдиренә фермала:	
20—25 инә суҫҡа булғанда	40-ҡа хәтле хеҙмәт көнө
25—30 »	45 »
30-ҙан артыҡ »	50 »
г) һарыҡсылыҡ фермаһы мөдиренә фермала:	
800—1000 һарыҡ булғанда	40-ҡа тиклем хеҙмәт көнө
1000—1500 »	45 »
1500-ҙән артыҡ »	50 »
түн тиреһе тоҡомо һарыҡтары фермаларында:	
200—300 һарыҡ булғанда	40-ҡа тиклем хеҙмәт көнө
300—500 »	45 »
500-ҙән артыҡ »	50 »

45. Ферма мөдиренә һәм малсылыҡ мөдирҙәренә, эш стажына ҡарап, өҫтәмә рәүештә түбәндәге күләмдә хеҙмәт көндәре яҙырға: колхозда өсөнсө йыл эшләүселәргә — ай һайын яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең 5 проценте күләмендә, дүртенсе һәм бишенсе йыл эшләүселәргә — 10 процент күләмендә, биш йыл һәм артығыраҡ эшләүселәргә — 15 процент күләмендә.

46. Ҙур күләмдәге һөтсөлөк-тауар һәм суҫҡасылыҡ фермаларында, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышының ҡарары менән, һәр бер 100 һыйырға һәм 30 инә суҫҡаға бригадир билдәләргә, был бригадирҙар мал ҡарау эшенән бушатылмайҙар.

Бригадирҙарға хеҙмәт көндәрен малдың тейешле группаларын хеҙмәтләндереүсе колхозсылар өсөн билдәләнгән расценкалар буйынса яҙырға, һәм бригаданың эшенә етәкселек иткәне өсөн айына 5-тән алып 10-ға хәтле хеҙмәт көнө яҙырға.

47. Малсылыҡтың баш һанын һәм продукты биреше үҫтереү планы үтәлгән хәлдә ферма мөдирҙәренә, малсылыҡ мөдирҙәренә малдың һәр бер төрө буйынса баш һанын һәм продукты биреше үҫтереү планының арттырып үтәлгән һәр бер проценте өсөн төп түләү буйынса уларға йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең бер проценте күләмендә хеҙмәт көнө яҙырға.

Малсылыҡтың баш һанын һәм продукты биреше үҫтереү планы үтәлмәгән хәлдә малдың һәр бер төрө һәм продукты биреше буйынса пландың үтәлеп еткерелмәгән һәр бер проценте өсөн ферма мөдирҙәренән, малсылыҡ мөдирҙәренән бер процент хеҙмәт көнөн списать итергә, ләкин списать ителгән хеҙмәт көндәренең һаны уларға йыл буйына яҙылып килгән хеҙмәт көндәренең 25 процентынан артыҡ булмаҫҡа тейеш.

48. Колхоздарға бригадирҙар, ферма мөдирҙәре, шулай уҡ колхоз председателдәре, счетоводтар һәм ауыл хужалығы специалистарынан башҡа, [illegible] тратив һәм хеҙмәтләндереү персоналы кешеләре баҫыуҙа һәм фермаларҙа колхоз эштәрен үтәүҙә турананан-тура ҡатнашырға һәм, колхозсыларҙың дөйөм йыйылышының ҡарары менән, колхозсылар өсөн хөкүмәт тарафынан билдәләнгән хеҙмәт көндәре минимумының кәмендә 25 процентен эшләргә бурыслылар, тип билдәләргә.

49. Колхоздарға колхоз счетоводының (бухгалтерының) хеҙмәте өсөн түләүҙе, эшенең күләменә һәм квалификацияһына ҡарап, колхоз председателенә яҙылған хеҙмәт көндәренең һәм аҡсалата өҫтәмә түләүҙең 60 процентенән алып 80 процентенә тиклем күләмендә билдәләргә кәңәш бирергә. Учетты яҡшы итеп ҡуйғаны өсөн счетоводҡа (бухгалтерға) колхоз председателе ала торған өҫтәмә түләүҙең 50 проценте күләмендә өҫтәмә түләү бирергә.

Бынан тыш, колхоз счетоводына (бухгалтерға), был колхозда ошо хеҙмәт урынында өсөнсө йыл эшләүсегә — уға хеҙмәт көндәре менән билдәләнгән төп түләүҙең 5 проценте күләмендә дүртенсе һәм бишенсе йыл эшләүсегә — 10 проценте күләмендә биш йыл һәм артығыраҡ эшләүсегә — 15 проценте күләмендә өҫтәмә хеҙмәт көндәре яҙырға.

Учетты ҡәнәғәтләнмәҫлек алып барғаны, йыллыҡ отчетты үҙ ваҡытында төҙөмәгәне һәм насар сифатлы төҙөгәне өсөн колхозсыларҙың дөйөм йыйылышы, колхоз правлениеһенең, ревизия комиссияһының йәки район ауыл хужалығы бүлеге мөдиренең тәҡдиме буйынса, колхоз счетоводының (бухгалтерының) хеҙмәте өсөн түләүҙе уның тарафынан йыл буйына эшләп алған хеҙмәт көндәренән 10 процентҡа тиклем кәметә.

50. Ошо Ҡарар айҡанлы СССР Халыҡ Комиссарҙары Советының һәм ВКП(б) Үҙәк Комитетының «СССР-ҙың көнсығыш райондарында колхоз председателдәренең хеҙмәте өсөн түләү тураһында» 1940 йылда 21 апрель Ҡарары (СССР Ҡарарҙары йыйынтығы, 1940 йыл, № 11, 271-се бит) көсөн юғалтҡан иҫәпләнә.

Бораулаусыларҙың производстволағы укыуҙары

Күптән түгел генә «Башнефть» берекмәһе «Туймазынефть», «Ишембайнефть» һәм «Башнефтеразведка» трестарында производство бригадаларының эшселәрен — бораулаусыларҙы, верхоройҙарҙы һәм башкаларҙы эксплоатацион һәм разведка бораулауы эшендә бәләкәй механизацияны кулланырға өйрәтеү өсөн махсус инструкторҙар вахталарҙа ойоштороу тураһында курҙатма биргәйне.

Ишембайҙа һәм Октябрьскийҙа, «Башнефтеразведка» трестының разведка партияларында шундай бер нисә вахта тәҙелдә һәм уҙенең беренсе һөҙөмтәләрен бирҙе.

Был вахталарҙа эшселәрҙе практик өйрәтеү эшен, нефть промышленносендә хеҙмәтте механизациялау Үҙәк институтының Өфөләге филиалы работниктәре ярҙамында, иң яхшы бораулау мастерҙәре алып бара.

Мәҫәлән, «Ишембайнефть» тресының иң яхшы бораулау мастерҙәренән береһе иптәш Федотов (хәҙер ул бәләкәй механизацияны кулланыу буйынса инструктор) ошо көндәрҙә бораулаусыларҙың беренсе группаһын өйрәтеү эшен тамамланы. Вахталарҙың эшселәре, иптәш Федотов ярҙамында уларҙы кулланыуға өйрәнеп, 155/36 һәм 156/36 буровойҙарҙы бораулау процессында өйрәнделәр. Улар хәҙер бәләкәй механизацияны дөрөҫ һәм тулы кулланып, бораулау эшендә катмарлы булған операцияны — оборудованиене ер аҫтына төшереү һәм күтәреү операцияһын кыҫка вакыт эсендә үтәргә өйрәнделәр.

Бораулаусыларҙың шундай укыуҙы уларҙың практик эшсендә айырым асык күренә. Мәҫәлән, бораулаусы Ғәйҙуллин, Субботин һәм Калашников етәкселек иткән вахталар, үҙҙәре карамағында булған бөтә бәләкәй механизацияны кулланып, хеҙмәт етештереүсәнлеген 22 процентка тиклем күтәреүгә өлгөштеләр, аварияһыҙ эшләй башланылар һәм производство заданиеһен арттырып үтәйҙәр.

Ошондай инструктор вахталары беҙҙең республикабыҙҙың нефтселәре өлгөһө буйынса кинсылык нефть районбарының башкаларында ла ойошторолаһаҡтар.

Х. Рафиков.

Лекторҙар колхоздарҙа

Асҡын районы культура-агартыу булеге эргәһендәге 11 кешелек штаттан тыш лекторҙар группаһы яҙғы баҫыу эштәре вакытында 134 лекция уткәрҙе. Был лекцияларҙы бөтәһе 10.820 колхозсы, МТС работниктәре һәм хеҙмәткәрҙәр тыңланылар.

Лектор иптәш Ярошенко был вакыт эсендә 19 колхозда «Ерҙе дөрөҫ эшкәртеү — юғары, урожай алыуҙың нигеҙе» һәм «Орлоктарҙы сәсеүгә әҙерләү» тигән темаларға, лекторҙар Галицкий һәм Зотов иптәштәр 16 колхозда һәм МТС работниктәре араһында «Урожайҙы күтәреүгә аҡламаларҙың әһәмиәте», «Берекмә ашлык культураларының нисек юғары урожай алырға», «Юғары урожай мастерҙәре — Социалистик Хеҙмәт Геройҙары» һәм башка темаларға лекциялар укынылар.

Хәҙер «Кый үләндәренә каршы көрәш», «Үсемлектәр нисек туҡланалар һәм йәшәйҙәр», «Ауыл хужалығы өлкәһендәге техник яңылыктар» һәм башка темаларға лекциялар уткәрелә.

Лекторҙарҙан Цыпин, Иҙбулатова һәм Ибраһимова иптәштәр ҙә үҙҙәренең общественный йөкләмәләрен ихтирам менән башкаралар.

Р. Колмөхәмәтов.

Тәжрибә менән уртаклашалар

КАРИЗЕЛ. Күптән түгел район мәғариф булеге башланғыс мәктәп укытыусылары менән өс көнлөк семинар уҙғарҙы.

Семинарҙа катнашыусылар тәүҙә Карҙел урта мәктәбе директоры иптәш Колоколовтың халкара хәл тураһында лекцияһын тыңланылар. Мәғариф булеге мөдире иптәш Валиев 1947—48 укыу йылының йомғактары һәм киләһе укыу йылында бурыстары тураһында доклад һөйләне.

Докладтан һуң эш таллбаларҙән уртаклашыу буйынса ғына укытыусылар сығыш яһаны. Укытыусылар Волиева «Мин дәресҡә нисек әҙерләнәм», Колтышева «Укыусыларҙан индивидуаль эшҡе нисек ойоштороға», Плоских «Ике класс менән нисек эшләргә», Проскурякова «Укытыусыларҙың йәйге эштәре» һәм башка мәсьәләләр буйынса докладтар һөйләнеләр.

М. Хәбирова.

...аллык норманы үтәүсе

1941 йылдың 22 июнендә, немец илбаҫарҙары, һуғыш иғлан итмәй торып, Советтар Союзының байтак калаларын бомбаға тоттолар һәм ил сиген утеп, Кызыл Армия менән һуғыш башланылар. Ирҙәр һуғышка китте... Улар эшләгән станоктарҙы туктатмау өсөн катын-кыҙҙарға производствога эшкә барырға кәрәк ине. Миллион катын-кыҙҙар производствога эшкә килде.

Фәхретдинова иптәш бына ошо көндәрҙә, һис бер әҙерлекһеҙ, үҙенең телефон аппараттары заводында эшкә урнашты. Уның элек производствола эшләгәне юк ине. Хатта, заводтарҙың эсенә инеп сыкканы ла юк ине...

Ул бик тырыш булды. Һәр көнлек, хеҙмәт талап иткән, ваҡ ның хәрәкәтен дә артык эш эшләмәй бирҙе, оторға, өйрәнергә тырышты. Һәм һәр көн һайын, хеҙмәт процессында кәрәкле булған, бер яңылыкты үҙләштерә килде. Ярты йыл эшләгәндән һуң, Фәхретдинованы эшкә һалалар түрәһендә цехтың стена газетаһын ...

ҙыулар. Ул бының укып сыкҡас, үҙенә-үҙе ышана башланы.

— Фәхретдинова иптәш, һеҙ яңы стахановка булырһығыҙ һеҙҙең эштә алымығыҙ бар, һәләтлелегегеҙ кәрәгенсе күренеп тора, — тинеләр.

Ул эш күтәренкелек менән эшләп тотондо һәм күп тә үтмәне, көндәлек эш нормаһын 120—130 процентка үтәлә башланы. Эштең көндән-көн алға барыуын шиде ул үҙе лә һиҙҙе. Көнгә 240 деталь эшләп сығарыу шиде уны ҡәнәғәтләндермәне. Етештереүсәнлекте арттырыу өсөн хеҙмәтте камиллаштереү юлын эҙләне... һәм уңышлык яулап алды. Ул көненә 560—600 деталь эшләп сығарырға өлгәште...

Хәҙер айлык норма 240 процентка еткереп үтәлә, һәм һуғыштан һуңғы беренсе биш йыллык планындағы нормалы, 10 йыллык план үтәлеп, 1957 йыл иҫәбенә продукция етештерә.

ҺҮРӘТТӘ: шнурҙар эшләүсе стахановсы С. А. Фәхретдинова.

В. Жданов фотоһы.

Үҙ өҫтәрендә эшләйҙәр

Бынан бер йыл элек Кырмыҫкалы районының укытыусылар профсоюзы конференцияһы профоргтарға, идея-политик һәм культура-массовый эштәрҙе киңерәк йәйелдерергә, тигән талапты куйғайны.

Профсоюздың район комитете (председателе иптәш Сәлихов) бер йыл эсендә укытыусылар араһында куп кенә саралар утҡәрҙе.

Укытыусыларҙың идея-политик кимәлен күтәреү максатында, «ВКП(б) тарихы» кыҫкаса курсын өйрәнеү буйынса 18 түңәрәк эшләне, районда бар укытыусылар ҙа уҙ эсендә алды. Укыуы йылы аҙағында 166 укытыусы курсты тамамланы.

Һынаусыларҙың һөҙөмтәһе күпселек укытыусыларҙың уҙ өҫтәрендә регуляр эшләүҙәрен курһәтте. Былар араһында бигерәк тә Кырмыҫкалы урта мәктәбенең директоры иптәш Михайловты, укытыусыларҙан Миһлебаева, Лагинова, Петрова, Павлова, Иванова, Якименко, Амельшикова һәм башка иптәштәрҙе укытыусыларҙан күрһәтергә кәрәк.

Райондың профсоюз ойошмалары «Укытыусылар кәрә» уткәреүгә серьез иғтибар бирәләр. Барлыһы 6 тапкыр «Укытыусылар кәрә» үткәрелеп, иптәш Сталин биографияһы, халкара хәл, В. И. Ленин- деңгә тормошо һәм эшмәкәрлеге, «Коммунистар партияһы манифесенең йөҙ йыллығы», «Диалектик материализм» һәм башка актуаль темаларға доклад һәм лекциялар ойошторолдо.

Ошоноң менән бергә, укытыусыларҙың квалификацияһын күтәреү юнәлешендә методик лекциялар уткәрелә.

Райондың укытыусылары уҙ өҫтәрендә эшләү менән бергә, культураға ла итеүҙә лә ойоштора белделәр. Мәктәптәрҙә укытыусылар коллективтәренән торган 19 үҙешмәкәр түңәрәк эшләй. Улар йыш кына район үҙәге клубында һәм радио аша сығыштар яһайҙар. Н. А. Некрасов, А. Н. Островский, А. М. Горький, В. Г. Белинский, Г. Тукай иҗадына арналған әҙәби кисәлар уткәрелә.

Үҙешмәкәр түңәрәктәр 750 һум акса йыйып йәтим балалар фондына тапшырҙылар.

Яҙғы сәсеү вакытында укытыусылар бик күп агит-массовый саралар утҡәрҙеләр. Улар тарафынан баҫыу стандарында 622 номер стена газетаһы һәм «боевой листок» сығарылды, 642 тапкыр кыҫкырып китап, газеталар укыу, 264 доклад һәм 62 художестволы сығыш ойошторолдо.

П. Микерин.

Фельетон урынына

Учалыса спорт

Беҙ спорттың куп төрҙәрен беләбеҙ. Спорт—совет йәштәренең һөйгән эше. Физкультура-спорт кешеләрҙе физик нығыта, хеҙмәткә һәм көрәшкә сыныкгыра. Шуға күрә физкультура беҙҙең илебеҙҙә киң таралған. Ләкин беҙ спорттың Учалыса төрөн күргәнебеҙ юк ине әле. Күптән түгел минә, Учалы районының һайлан, шундай яңылыкты асырға тура килде.

Ул яңылыктың һөйләргә керешкәнсе, бер хәҙерләргә кәрәк: һаман Ғилмановлар районында кыҙык бер кешесе булған. Уның алдынды сбруйы тоҡ юконо булган Юлға сыкҡан, унда һаҡ дилбегәне, колак бауы, йүгән уҙгарылы иҙелә. Туктамалып, ярым бөтә агай. Кешелер кәнөр...

Колмөгәҙ ...кса... ...кар ике көтмәй генә... сбруй юкҡа булһа ла, упың караҡ быпа минән аҫта кайышка ...тән тире бар...

Учалы физкультура комитетенең председателе иптәш Ғилманов, ирһеҙҙән, шул ағайҙы мыца хәтерләтте. Улар ысындан да берберенә бик оҡшағандар. Айырма тик шунда ғына: ағай элек йәшәгән, Ғилманов хәҙер йәшәй.

Хәҙер спорт яңылығына күсәбеҙ. Былтыр райондың үҙәге Учалыла физкультура база майҙансығын тәбәп уйнайҙар. Был Учалыса... футбол була ине. Ә волейбол урынына... ситон аша кәнә сейешелдар...

Белкн, укыусылар: «Учалыла физкультура майҙаны юктыр...», тип уйларһығыҙ. Был юлы ла Ғилманов иптәш, әлеге агай һымак, үҙе ауып бирҙе.

— Беҙҙен йәштәр базар майҙанында сабата тиндә-тинһеҙ, кәпсейһә-сейһән, уның карауы, бына тигән стадион бар беҙҙә.

Ысынлап та Учалыла стадион бар. Тик уның капкаларын йоҙаҡ һуғып куйылған. Курһән, Ғилмановлар иптәш та стадиондағы, тик уйнамайҙар. Нигеҙ, уйнарға мөмкинлек хәҙер ... ...

Беҙ учалылар өсөн тағы яңы спорт төрө тәҡдим итәбеҙ. Был уйын да футболға окшаған. ...нырак. Тик бында туп түгел, дыҡнеҙ етәксе Ғилмановты үҙенең кабинетенән — аутка ебәрергә кәрәк.

Н. Хәфизов.

Ярышып эшләйҙәр

Мәләүеҙ районы колхозсыларының саҡырыуы буйынса Ишембай—Ермолаевка тимер юлы төҙәлешендә башланған социалистик ярыш көндән-көн киң колас ала. Хеҙмәт етештереүсәнлеге күтәрелә бара. Федоровка районы Пушкин исемендәге колхоз члендаре, партия ойошмаһы секретаре иптәш Дәүләтбердин етәкселегендә, һоҡланғыс эш өлгөләре күрһәтәләр. Мәмбәтколова һәм Вәлишина иптәштәрҙең группалары, иртәнге сәғәт 4-тән кискә 10-ға тиклем үҙ ара ярышып эшләп, һәр бер кешегә 11-әр кубометр ер эше башкаралар.

Ғафури районы «Кармантау» колхозының иптәш Кунафин етәкселек иткән комсомолец-йәштәр бригадаһы члендаре вак группаларға бүленеп эшләп, көндәлек нормаларын 150—200 процентка еткереп үтәйҙәр.

Заданиене срогынан алда тамамлау өсөн

Ишембай—Ермолаевка тимер юлын төҙәүҙә Дәүләкән районынан 100 ат һәм 500 кеше урынына 250 ат һәм 1350 кеше эшләй. Колхозсылар 46 мең кубометр ер эштәре башкарыу заданиеһен 10—15 көндә үтәү өсөн көрәшәләр. Райондың «Кыҙыл Урал», «Кыҙыл тормош», «Красный боевик» «Коммунар» һәм башка ауыл хужалығы артелдәренең члендәре үҙ-ара ярышып эшләү һөҙөмтәһендә, юғары етештереүсәнлек бирәләр.

Камал Хәбиб

Тимер юлсыларға

...Унда буш бер дала булған,
Бүрелар йөрөгән олоп,
Елдәр генә уйнап торган
Асыулы хужа булып.

Зарланып уҙған юлсылар
Емерек юлдарҙан элек.
Ауып-батып яткан улар,
Арык аттарын һүгеп.
Юлаусы кешелар бында
Быуаттар буйы яныл,
Тимер юл һалыу хаҡында
Уйланған хыялланып.

Калды ул дәүерҙәрҙә тик
Һөйләргә генә инде...
Юл төҙөү өсөн халкыбыҙ
Һыҙғанып бында килде.

Хәбәрһеҙ айырылып торған
Туған һенелдәр төҫлө,
Тоташыр, кауышкан һымак,
Кәйөргәҙе менән Өфө.

Күмер тейәп киң Уралга,
Бышкырып, йөрәк кағып,
Тәүлек буйы был юлдарҙа
Поездар йөрөр сабып.

Бәхеткә илтә был юлдар
Һөйөклө илебеҙҙе,
Юл төҙәүсе алтын кулда
Тәбрик итәбеҙ һеҙҙе!

Кала малярия станцияһы 30 июнда 6 июлгә тиклем республикан малярия станцияның малярия серәкәйҙәре кукәйҙәренә каршы ... максатында, һаҙлыкты ... молеттан ағыу һибеү ... нәүбәттәге өсенсе тура ... кәреүс тураһында б...

Был эш Өфө ... ы зонала 5 километр алыҫлыкта ... ...лоцияһы нала, Октябрь, Миловка, исемендәге ...евка, Ромихайловка, ...сы номерманово, ...алыны хужале совхозы, ...ндрка, Базнлыһы, Ал... ...то, Дудник левка, Ө... ...ино, Чесноковка, кисеүе, ...номе совхозының элекке хужа...ғы, Максикала ...вка, Тә...евка, Стемов, ... Тамаҡо, Сосновка пано... Шакш Р. Ермаш, Кн...о, ...ово, Вн...ково, Бала-К... Елкибаево, Каиповка, ...вка ауылдары, Дим станцияһы һәм Черниковск калаһы ...рәһендә. ...одифеналамин ...эм париж ...шеллеге һибеү юлы менән үҙәреләсәк.

Умарталарҙы ағыулаһасаҡ һыуҙарҙан — 10 километр алыҫлыкка ...үсерергә кәрәк. Мал-тыуарҙы булған кешеләр маларын ағыуланған һыуҙары өс тәүлек буйынса ебәрмәскә тейештәр. Белешмәлә өсөн адрес: Өфө калаһы, Һорупа урамы, 74-се номерле йорт, телефон номере 2-92-91

Кала малярия станцияһы.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәренең Варшава кәңәшмәһендә кабул ителән белдереүенә откликтәр

ЮГОСЛАВИЯ

БЕЛГРАД, 28 июнь. (ТАСС). Бөгөн «Борба» газетаһы беренсе биттә эре хәрефтәр менән яҙылған «Варшава белдереүенең әһәмиәте» тигән баш аҫтында газетаның сит илдәр бүлеге редакторы Душан Благоевичтең мәҡәләһен баҫып сығара.

Мәкалалә Америка империалистәре һәм уларҙың Европалағы ялсылары тарафынан тормошка ашырыла торған политика — Германияны бүлгеләү политикаһы систематик рәүештә тыртыла. Улар фашизмде тар-мар итеү менән килешмәселәр һәм бөгөн азатлык һөйөүсе халкка каршы юнәлтелгән яңы һуғыш авантюралары тураһында хыяланалар. «Борба» газетаһы был политиканың тыныслык эшенә кыркынлыс булып торғанын айырыуса билдәләй.

Мәкаләһенән ары Көнбайыш Германиянык колонияһына әйләндерергә тырышыусы Уолл-стрит дипломатияһы тоткан политика фашелә. Газета американлыларҙың Германияны бүлгеләү юлы менән государство булыу яңы ... ...һөҙлөгө... ... яктан бөтөнлөгәнән мәҡ итергә тырышыуҙарына Германия халкының каршылык күтәреүен айырыуса билдәләй.

Һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре белдереүенең әһәмиәтенә баһа биреүгә күсеп, «Борба» газетаһы былай тип яҙа: «Европала үҙәгендә яңы һуғыш курһылыһын булдырыу политикаһына (көнбайыштағы көстәр был Германияның хәрби промышленносең аякка баҫтырыу, Германияны бүлгеләү һәм немец халкының агрессив карашларын ... юлы менән тормошка ашыралар), кәтғи рәүештә каршылык күрһәтеп, Варшава кәңәшмәһендә катнашыусы государстволар бөтә Европа халыктарының интерестәренә тулыһынса яраклы рәүештә Германия мәсьәләһен ке тәртибенән алыуға мөмкинлек биреүсе юлды күрһәттеләр».

«Варшава белдереүенең хараҡтере, — тип әйтелә мәкаләлә, — шуның менән билдәләнә, ул Советтар Союзы етәкселегендә тыныслык һәм бөтә илдәр халыктарының демократик хеҙмәттәшлеге өсөн ысын күңелдән көрәшеүсе һәм башка халыктар интерестәрен кыркыныс тыуҙырыу фекере уларҙан бөтөнләй ят нәмә булған ысын демократик илдәр тышкы политикаһының кәүҙәләнеше булып тора».

«Варшава кәңәшмәһе, — тип яҙа «Борба» һөҙөмтәләү өлөшөндә, — үҙҙәренең экспансионистик максаттары интерестәрендә Германия мәсьәләһе буйынса ла Европаны ике капма-каршы лагерға бүлеүҙе тәрәнәйтергә ынтылыусы көнбайыштағы круттарҙың агрессив пландарын тулыһынса фаш итте. Варшава белдереүе Германия тураһындағы мәсьәләне үҙҙәрен Европалағы айырым халыктар интерестәренең йәки Европа государстволарының теге йәки был төркөмө иминселегенең интерестәренең бәрелешеүе тураһында бәргәләлыгын ысыклы рәүештә ...фатлар булып тора. Ул Германия мәсьәләһе буйынса бөгөн бөтә Европа халыктарының интерестәренең Европалағы иминселек һәм тыныслык интерестәренең бөтә донъя хакимлек итеү тураһында уҙҙәренең хыялдарын тормошка ашырыу өсөн Европа халыктарын яңы ...лешеүгә этәреүсе монополистик хәрби спекулянттарҙың һәм дарҙың йөҙсенләренең бер бәләкәй төркөмөнөң эгоистик, антидемократик интерестәре менән бәйләнешеүен раҫлаһы».

АВСТРИЯ

ВЕНА, 27 июнь. (ТАСС). «Эстеррейхише Цейтунг» газетаһы һигеҙ государство Сит ил Эштәре Министрҙәре белдереүенең тулы текстың баҫып сығарҙы. «Варшава кәңәшмәһе Германияны милитаризациялау, Рур әлкәһен дүрт илдең контроленә булдырыу ... ...эк хөкүмәт төҙәүҙе, ирашыу ... ...ды төҙәүҙе һәм репарация йөкләмәләрен үтәүҙе талап итә», тигән закловкаларҙы һыҙык өҫтөнә алды.

«Эстеррейхише фольксштимме» газетаһы һигеҙ ил министрҙәре белдереүенең йөкмәткеһен баҫып сығарҙы, 8 державаның Варшавалағы конференцияһы «бөтә донъяла Германия проблемаһын тыныслык һәм демократик интерестәрендә хәл итеү юлын күрһәтте», тип билдәләй.

Калған газеталар белдереүҙән өҙөмтәләрҙе кыҫкаса яҙыу менән сикләнәләр.

Японияла көслө ер тетрәү

ЛОНДОН, 28 июнь. (ТАСС). Рейтер агентствоһының Токиолағы хәбәрсеһенең белдереүенә карағанда, бөгөн төштән һуң Японияның ...к өлөшөндә көслө ер тетрәү булып үткән. Ер тетрәгән районда диңгеҙ ...ары буйында ер өҫтөндә булған һел... ...еүҙәрҙән һуң ук эҙ тулкын кут... ...тгән. Ул ярға бәрелеп, яр буйында... ...кун кенә ауылдары емергән.

Фукуи калаһы ер тетрәүҙән бик зур зарарланған. Тәүге мәғлүмәттәргә карағанда, бер нисә мең йорт емерелгән. Каланы янғын солғап алған. 30 меңдән ашыу кеше үлгән һәм яраланған. 100 меңгә яҡын кеше йортһоҙ һәм бер нәмәһеҙ калған.

Яуаплы редактор:
Г. В. ГУЗАИРОВ.

Потребителдәр кооперацияһы пайщиктәре-члендәре иғтибарына

Башпотребсоюз правлениеһе сельполарҙың, совхоз рабкоопарының, Райполарҙың бөтә пайщиктәре-члендәре иғтибарына түбәндәгеләрҙе белдерә: 1948 йылдың I июленә тиклем был ойошмаларҙа кооператив членлегенең иҫке кенәгәләре яңы кенәгәләргә алыштырыла.

1948 йылдың 1 июненә тиклем бирелгән бөтә кооператив членлегә кенәгәләре, шулай ук пайщиктәрҙең бер сельпонан икенсе сельпоға күскәндә учеттан төшөрөлөүе тураһындағы справкалар-талондар алыштырылырға тейештәр.

Элекке кала кооперативтәре (Горпо, ЦРК һ. б.) члендәренең кооператив членлек кенәгәләре, уларҙың пай взностары государство сауҙаһы системаһына йәки предприятиелар карышындағы ОРС-тарға күсерелгәнлектән, алыштырылмай.

Шулай ук башка сельполарҙан учеттан төшмәй килгән һәм учеттан төшеү тураһында билдәле өлгөләге справкалары-талондары булмаған пайщиктәрҙең дә членлек кенәгәләре алыштырылмай.

Үлгән пайщиктәрҙең кенәгәләре тейешле сельполарҙың рабкоопарҙың, Райполарҙың правлениеләренә тапшырылырға, ә уларҙың пай взностары, закон менән билдәләнгән варислек тәртибен күҙәткән халдә, варистәренә (үлгән членлерҙенә, якын туғандарына) кайтарып бирелергә тейеш.

Сельпо эшләгән урындан башка районга (калаға), потребителдәр обществоһы булмаған урынға күсеп киткән пайщиктәр, элек үҙҙәре член булып торған сельполарҙан, совхоз рабкоопарынан һәм Райполарҙан учеттан төшөрөү тураһында справка һорарға һәм, кәрәк булған халдарҙа, потребителдәр обществоһы уставы менән билдәләнгән тәртип буйынса, пай взностарын кире кайтарып алырға хаклылар.

Һәр бер пайщикка, ул үҙенең иҫке кенәгәһен биргәс тә, сельпо правлениеһе яңы членлек кенәгәһе бирергә бурыслы. Иҫке кенәгәләр урынына яңыларҙы бирмәйенсә, иҫкеләрҙе йыйып алыу кәтғи рәүештә тыйыла.

Яңы кенәгә биргән вакытта һәр бер пайщиктан был кенәгәнең хакы—50 тин акса алына.

Башпотребсоюз правлениеһе

Редакция адресы: Өфө калаһы, Карл Маркс урамы, 25. Телефон номерҙәре: яуаплы редактор урынбаҫары һәм секретариат — 2-83-87, пропаганда һәм партия тормошо бүлектәре — 2-78-48, промышленность һәм информация бүлектәре — 2-80-49, ауыл хужалығы бүлеге — 2-86-29, хеҙмәтсәндәр хаттары, культура һәм тормош бүлектәре — 2-72-26.

П 02501. Өлкә газета-журналдар типографияһы. Тиражы 14500.